**ПА́СПОРТНЫЙ,** -ая, -ое паспорт ...ы; **па́спортный отде́л** паспорт бүлеге; **па́спортная систе́ма** паспорт системаһы

**ПАССА́Ж** *м* пассаж (**1.** *ике яҡлап теҙелгән сауҙа рәттәренән торған параллель урамдарға сыҡмалы ябыҡ галерея* **2.** *музыкаль әҫәрҙең ҙур башҡарыу оҫталығы талап иткән өлөшө*)

**ПАССАЖИ́Р** *м* пассажир, юлсы, юлаусы; **зал для пассажи́ров** пассажирҙар залы

**ПАССАЖИ́РСКИЙ,** -ая, -ое пассажир(ҙар) ...ы, юлсылар ...ы; **пассажи́рский по́езд** пассажир поезы

**ПАССА́Т** *м*; *геогр.* пассат (*тропик киңлектәрҙә океандарҙан йыл әйләнәһенә иҫеп торған тотороҡло һауа ағымы*)

**ПАССИ́В** *м* пассив (**1.** *бухг. предприятиеның бурәсәктәре һәм йөкләмәләре* **2.** *кҫм. бирәй кеше йәки нәмәнең йомшаҡ яғы, кәмселеге* **3.** *грам. ҡылымдың төшөм йүнәлеше*); **пасси́в ба́нка** банкының пассивы; **подсчита́ть пасси́в** пассивты иҫәпләү

**ПАССИ́ВНОСТЬ** *ж* пассивлыҡ, һүлпәнлек; **прояви́ть пасси́вность** һүлпәнлек күрһәтеү

**ПАССИ́ВНЫЙ I,** -ая, -ое **1.** (*бездеятельный, инертный*) пассив, һүлпән; **пасси́вная борьба́** һүлпән көрәш **2.** (*редко используемый*) пассив, һирәк ҡулланылған; **пасси́вный запа́с слов** һүҙҙәрҙең пассив запасы ♦ **пасси́вное избира́тельное пра́во** пассив һайланыу хоҡуғы

**ПАССИ́ВНЫЙ II,** -ая, -ое **1.** *бухг.* пассив ...ы; **пасси́вные ба́нковские опера́ции** банкының пассив операциялары **2.** *грам.* пассив, төшөм йүнәлеше ...ы; **пасси́вная констру́кция** пассив конструкция

**ПА́СТА** *ж* паста; **зубна́я па́ста** теш пастаһы

**ПА́СТБИЩЕ** *с* көтөүлек, утлау, үреш; **го́рные па́стбища** тау көтөүлектәре

**ПА́СТБИЩНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көтөүлек ...ы; **па́стбищные уго́дья** көтөүлек ерҙәре **2.** көтөүлектә йөрөтөү ...ы; **па́стбищный пери́од** көтөүлектә йөрөтөү осоро

**ПА́СТВА** *ж собир.*; *рел.* мәхәллә халҡы (*бер ғибәҙәтханаға йөрөп ғибәҙәт ҡылыусылар*)

**ПАСТЕ́ЛЬ** *ж*; *жив.* пастель (**1.** *рәсем төшөрөң өсөн йомшаҡ буяу ҡәләмдәре* **2.** *шундай ҡәләмдәр менән төшөрөлгән рәсем*)

**ПАСТЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** пастель ...ы; **пасте́льный каранда́ш** пастель ҡәләме **2.** пастель менән төшөрөлгән; **пасте́льный рису́нок** пастель менән төшөрөлгән рәсем

**ПАСТЕРИЗА́ТОР** *м* пастеризатор (*пастеризациялау аппараты*)

**ПАСТЕРИЗА́ЦИЯ** *ж* пастеризация, пастеризациялау; **пастериза́ция консе́рвов** консерваларҙы пастеризациялау

**ПАСТЕРИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **пастеризова́ть 2.** *прил.* пастеризацияланған

**ПАСТЕРИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. что* пастеризациялау, пастеризация яһау; **пастеризова́ть молоко́** һөттө пастеризациялау

**ПАСТЕРИЗОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **пастеризова́ть**

**ПАСТЕРНА́К** *м* бүтбүлдек, ҡуянтубыҡ

**ПАСТИ́** *несов. кого-что* көтөү; **пасти́ скот** мал көтөү

**ПАСТИЛА́** *ж* ҡаҡ; **я́блочная пастила́** алма ҡағы
**ПАСТИ́СЬ** *несов.* көтөүҙә утлап йөрөү, утлау
**ПА́СТОР** *м* пастор (*протестант руханийы*)
**ПАСТОРА́ЛЬ** *ж* пастораль (*XIV—XVIII бб. Европа әҙәбиәтендә һәм сәнғәтендә көтөүсе-ләр тормошон тәбиғәт ҡосағында тыныс, ва-йымһыҙ итеп тасуирлаған жанр һәм шул жанрҙағы әҫәр*)
**ПАСТУ́Х** *м* и **ПАСТУ́ШКА** *ж* көтөүсе
**ПАСТУ́ШЕСКИЙ,** -ая, -ое көтөүсе ...ы; **пасту́шеское жили́ще** көтөүсе торлағы
**ПАСТУ́ШЕСТВО** *с* көтөүсе булыу
**ПАСТУ́ШИЙ,** -ья, -ье көтөүсе ...ы; **пасту́шья пе́сня** көтөүсе йыры ♦ **пасту́шья су́мка** *бот.* көтөүсе муҡсаһы
**ПАСТУ́ШИТЬ** *несов.*; *разг.* көтөү көтөү
**ПАСТУШО́НОК** *м* көтөүсе малай
**ПА́СТЫРЬ** *м* **1.** *уст.* көтөүсе **2.** *рел.* пастырь (*рухани, мәхәллә башлығы*)
**ПАСТЬ I** *сов.* **1.** *см.* **па́дать** 1, 3—5, 7; **2.** *книжн.* һәләк (вафат) булыу **3.** (*о правительстве, политическом строе и т.п.*) ҡолатылыу, бәреп төшөрөлөү; **прави́тельство па́ло** хөкүмәт ҡолатылды **4.** (*о городе, крепости и т.п.*) еңелеү, бирелеү; **кре́пость па́ла** ҡәлғә бирелде **5.** (*об атмосферных осадках*) төшөү; **у́тром па́ла роса́** иртән ысыҡ төштө ♦ **пасть ду́хом** төшөнкөлөккә бирелеү; **пасть же́ртвой** ҡорбан булыу, шәһит булыу
**ПАСТЬ II** *ж* **1.** ауыҙ (*йыртҡыс хайуандарға, балыҡтарға ҡарата*) **2.** *перен.* өңрәйгән тишек
**ПАСТЬБА́** *ж* көтөү, утлау; **повести́ скот на пастьбу́** малды утлауға алып китеү; **круглосу́точная пастьба́** тәүлек әйләнәһенә көтөү
**ПА́СХА** *ж* **1.** Пасха (*йәһүдтәрҙең яҙғы дини байрамы*; *христиандарҙа Христостың тереле-ценә бағышланған байрам*); **пра́здновать Па́сху** Пасханы байрам итеү **2.** пасха (*христиандарҙың шул байрам уңайы менән бешерелгән татлы ашамлығы*); **испе́чь па́сху** пасха бешереп алыу
**ПАСХА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое Пасха ...ы; **Пасха́льная неде́ля** Пасха аҙнаһы; **пасха́льные я́йца** Пасха йомортҡалары (*буялған, биҙәлгән*)
**ПАСЫНКОВА́ТЬ** *сов., несов. что*; *с.-х., сад.* (артыҡ ян үренделәрҙе) алып ташлау
**ПА́СЫНОК** *м* **1.** *прям., перен.* үгәй ул, үгәйһетелгән (ситләтелгән) кеше **2.** *с.-х., сад.* артыҡ ян үренде
**ПАСЬЯ́НС** *м*; *карт.* пасьянс
**ПАТ I** *м*; *шахм.* пат
**ПАТ II** *м* пат (*мармелад төрө*)
**ПАТЕ́НТ** *м* патент (**1.** *уйлап табыусының авторлыҡ хоҡуғын раҫлаған документ* **2.** *берәй төрлө хоҡуҡты, вәкәләтлекте һ.б. раҫлаған документ* **3.** эшҡыуарлыҡ *менән шөғөлләнеүгә хоҡуҡ биргән танытма*); **получи́ть пате́нт на изобрете́ние** уйлап табыуға патент алыу; **ко́нсульский пате́нт** консуллыҡ патенты; **пате́нт на прода́жу лека́рства** дарыу һатыуға патент
**ПАТЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое патент ...ы; **пате́нтное пра́во** патент хоҡуғы; **пате́нтный сбор** патент йыйымы
**ПАТЕНТОВА́НИЕ** *с см.* **патентова́ть**
**ПАТЕНТО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **патентова́ть** **2.** *прил.* патентлы, патент бирелгән; **патенто́ванное лека́рство** патентлы дарыу
**ПАТЕНТОВА́ТЬ** *сов., несов. что* **1.** патентлау, патент биреү **2.** патент алыу
**ПАТЕНТОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **патентова́ть**
**ПАТЕ́ТИКА** *ж*; *книжн.* патетика (*ялҡынлы дәрт, күтәренке рух менән һуғарылған ауаз*)
**ПАТЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое патетик; **патети́ческая речь** патетик телмәр; **патети́ческий стиль** патетик стиль
**ПАТЕТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **патети́ческий**
**ПАТЕФО́Н** *м* патефон; **заводи́ть патефо́н** патефонды бороп ебәреү
**ПАТЕФО́ННЫЙ,** -ая, -ое патефон ...ы; **патефо́нная пласти́нка** патефон пластинкаһы (тәрилкәһе)
**ПАТОГЕНЕ́З** *м*; *мед.* патогенез (*ауырыуҙың башланғандан алып көсәйгәнгә тиклемге барышы һәм патология фәненең шул процесы өйрәнә торған бүлеге*)
**ПАТОГЕНЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *мед.* патогенетик
**ПА́ТОКА** *ж* патока, крахмал шәрбәте
**ПАТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *мед.* патологик; **патологи́ческая анато́мия** патологик анатомия **2.** *перен., книжн.* патологик, нормаль булмаған, норманан тайпылған; **патологи́ческое явле́ние** патологик күренеш
**ПАТОЛО́ГИЯ** *ж* патология (**1.** *ауырыу нәтижәһендә кеше һәм хайуан организмында норманан тайпылыуҙарҙы өйрәнә торған фән* **2.** *мед. организмдағы ауырыу процестары, нормаль хәлдән тайпылыштар* **3.** *күсм., кит. норманан тайпылыш, нормаль түгел*); **о́бщая патоло́гия** дөйөм патология; **патоло́гия туберкулёза** туберкулёз патологияһы; **патоло́гия сосу́дов** тамырҙарҙың патологияһы; **патоло́гия разви́тия о́бщества** йәмғиәт үҫеше патологияһы
**ПАТРИА́РХ** *м* **1.** ырыу башы, оло уҙаман; **патриа́рх дере́вни** ауылдың оло уҙаманы **2.** *высок.* аҡһаҡал, оло хөрмәткә лайыҡ кеше; **патриа́рх башки́рской литерату́ры** башҡорт әҙәбиәтенең аҡһаҡалы **3.** патриарх (*православие динендәге иң юғары рухани дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше*); **Патриа́рх Всея́ Руси́** Бөтә Русь патриархы
**ПАТРИАРХА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** патриархаль ...ы; **патриарха́льный строй** патриархаль

ҡоролош **2.** (*чуждый новой культуре, консервативный*) патриархаль, иҫкесә, боронғоса; **патриарха́льное воспита́ние** патриархаль тәрбиә

**ПАТРИАРХА́Т** *м* патриархат (*тәүтормош йәмғиәтендә ирҙәр хакимлығы менән билдәләнгән һуңғы дәүер*)

**ПАТРИО́Т** *м* и **ПАТРИО́ТКА** *ж* патриот, илһөйәр, ватансы

**ПАТРИОТИ́ЗМ** *м* патриотизм, патриотлыҡ, ватансылыҡ

**ПАТРИОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** патриот ...ы, ватансылыҡ ...ы, патриотлыҡ ...ы; **патриоти́ческий долг** патриотлыҡ бурысы **2.** патриотик, тыуған илгә һөйөү; **патриоти́ческое воспита́ние** тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү; **патриоти́ческие стихи́** патриотик шиғырҙар

**ПАТРИОТИ́ЧНОСТЬ** *ж* патриотлыҡ, патриотлылыҡ; ватансылыҡ; **патриоти́чность посту́пка** эштең патриотлылығы

**ПАТРИОТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ватансыларға хас, патриотик; **патриоти́чный посту́пок** патриотик ҡылыҡ (эш)

**ПАТРИЦИА́Т** *м*; *ист.* патрицийҙар, идара итеүсе ҡатлам

**ПАТРИ́ЦИЙ** *м*; *ист.* патриций (*Боронғо Римдағы юғары ҡатлам кешеһе*)

**ПАТРО́Н I** *м* патрон (**1.** *тар. Боронғо Римда плебейҙарҙы һәм ирекккә ебәрелгән ярлы граждандарҙы үҙ яҡлауына алып, бойондороҡло хәлгә ҡуйған патриций* **2.** *баш, башлыҡ, начальник, хужа*)

**ПАТРО́Н II** *м* патрон (**1.** *гильзаға һалынған дары, пуля йәки дороп һәм капсюль* **2.** *ниҙе лә булһа һаҡлау өсөн цилиндр рәүешендәге бәләкәй генә ҡап* **3.** *тех. станоктарҙа эшкәртә торған деталде йәки ҡырҡа торған ҡоралды ҡыҫтырып ҡуя торған яйланма* **4.** *яҡтыртҡыс приборҙың лампочканы бороп ҡуя торған өлөшө* **5.** *махс. тегеү сәнәғәтендә аяҡ кейеме тегеү һәм тире иләү эшендә бесеү өлгөһө*)

**ПАТРОНА́Ж** *м* **1.** (*медицинское обслуживание грудных детей и больных на дому*) патронаж **2.** *уст.*, *книжн.* (*покровительство со стороны кого-л.*) яҡлау

**ПАТРОНА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое патронаж ...ы; **патрона́жная сестра́** патронаж туташы

**ПАТРОНА́Т** *м* патронат (*йәтим балаларҙы дәүләт органдары пособиеһы иҫәбенә һәм уларҙың күҙәтеүе аҫтында ғаиләләрҙә тәрбиәләү формаһы*)

**ПАТРО́ННИК** *м* патронлыҡ, патронник

**ПАТРО́ННЫЙ,** -ая, -ое патрон ...ы; **патро́нная ги́льза** патрон гильзаһы; **патро́нный я́щик** патрон йәшниге

**ПАТРОНТА́Ш** *м* патронташ, саҡса

**ПА́ТРУБОК** *м*; *тех.* патрубок (*төп үткәргес торбанан, резервуарҙан һ.б. айырылып киткән ҡыҫҡа торба*)

**ПАТРУЛИ́РОВАНИЕ** *с см.* **патрули́ровать**; **патрули́рование лесо́в** урмандарҙа патруллек итеү

**ПАТРУЛИ́РОВАТЬ** *несов. что* и *без доп.* патруллек итеү; **патрули́ровать морски́е берега́** диңгеҙ ярҙарында патруллек итеү

**ПАТРУ́ЛЬ** *м* патруль; **патру́ль мили́ции** милиция патруле; **зелёный патру́ль** йәшел патруль (*урманды һаҡлау буйынса*)

**ПАТРУ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** патруль ...ы; **патру́льная слу́жба** патруль хеҙмәте; **патру́льный самолёт** патруль самолёты **2.** *в знач. сущ.* **патру́льный** *м* патрульный

**ПА́УЗА** *ж* **1.** *прям.*, *перен.* пауза, тыныш, тынлыҡ, туҡтап тороу; **наступи́ла па́уза** тынлыҡ урынлашты; **па́уза в рабо́те** эштә туҡтап тороу **2.** *муз.* пауза

**ПАУ́К** *м* үрмәксе

**ПАУКООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үрмәксе һымаҡ **2.** *в знач. сущ.* **паукообра́зные** *мн.*; *зоол.* үрмәксе һымаҡтар

**ПАУПЕРИЗА́ЦИЯ** *ж*; *книж.* пауперлашыу (*хеҙмәтсән халыҡтың күпләп бөлгөнлөккә төшөүе*)

**ПАУТИ́НА** *ж* **1.** үрмәксе ауы **2.** *перен.* ау; **опу́тать паути́ной лжи** ялғанлыҡ ауына эләктереү

**ПАУТИ́НКА** *ж*; *разг.* **1.** үрмәксе ауы ебе **2.** (*вязанье, вышивка*) селтәр шәл, паутинка

**ПАУ́ЧИЙ,** -ья, -ье үрмәксе ...ы; **пау́чьи се́ти** үрмәксе ауҙары

**ПА́ФОС** *м* пафос (**1.** *ялҡынлы дәрт, рух күтәренкелеге* **2.** *юғары идеянан килгән илһам, дәрт*); **говори́ть с па́фосом** пафос менән һөйләү; **па́фос созида́тельного труда́** ижади хеҙмәт пафосы

**ПАХ** *м* сат, сандыр

**ПА́ХАНЫЙ,** -ая, -ое һөрөлгән; **па́ханые зе́мли** һөрөлгән ерҙәр

**ПА́ХАРЬ** *м* һабансы (*ер һөрөүсе*)

**ПАХА́ТЬ** *несов. что* и *без доп.* һөрөү; **паха́ть зе́млю** ер һөрөү ♦ **(и) мы паха́ли** *ирон.* беҙ ҙә тик ятманыҡ

**ПА́ХНУТЬ** *несов.* **1.** *чем* и *без доп.* еҫ аңҡыу (бөркөү, килеү, сығыу); **па́хнет се́ном** *безл.* бесән еҫе килә; **цветы́ прия́тно па́хнут** сәскәләр хуш еҫ бөркә **2.** *чем безл.*; *перен.*, *разг.* аңҡыу; **па́хнет старино́ю** иҫкелек еҫе аңҡый **3.** *чем*; *перен.*, *разг.* ихтимал, мөмкин булыу; **па́хнет ссо́рой** *безл.* ыҙғыш сығыуы ихтимал ♦ **па́хнет по́рохом** һуғыш еҫе килә

**ПАХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *чем* и *без доп.* (*повеять*) иҫеп ҡуйыу; **пахну́ло хо́лодом** *безл.* һалҡынса ел иҫеп ҡуйҙы **2.** *чем безл.*; *перен.* хәтерләтеү, иҫкә төшөрөү, хәтирә уятыу

**ПАХОВО́Й** и **ПА́ХОВЫЙ,** -ая, -ое сат ...ы, сандыр ...ы; **паховы́е же́лезы** сат биҙҙәре

**ПА́ХОТА** *ж* **1.** *см.* **паха́ть 2.** һөрөлгән ер; **идти́ по па́хоте** һөрөлгән ерҙән барыу

**ПА́ХОТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һөрөү ...ы; **па́хотное вре́мя** һөрөү ваҡыты; **па́хотный инвента́рь** һөрөү

инвентары **2.** һөрөнтө, һөрөүгә яраҡлы; **па́хотная земля́** һөрөнтө ер

**ПА́ХТА** *ж* май айраны

**ПА́ХТАНЬЕ** *с см.* **па́хтать**

**ПА́ХТАТЬ** *несов. что* май бешеү (яҙыу); **па́хтать ма́сло** май бешеү

**ПАХУ́ЧИЙ,** -ая, -ее еҫле, хуш еҫле

**ПАЦИЕ́НТ** *м* и **ПАЦИЕ́НТКА** *ж* пациент (*врачҡа күренергә килгән кеше*)

**ПАЦИФИ́ЗМ** *м* пацифизм (*һәр төрлө һуғышҡа, милли азатлыҡ һәм революцион көрәшкә ҡаршы булған хәрәкәт*)

**ПАЦИФИ́СТ** *м* пацифист (*пацифизм яҡлаусы*)

**ПАЦИФИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое пацифистик; **пацифи́стские взгля́ды** пацифистик ҡараштар

**ПА́ЧЕ: тем па́че**; **па́че того́** *книжн.* бигерәк тә, шуға күрә лә

**ПА́ЧКА** *ж* **1.** бәйләм, төргәк; **па́чка пи́сем** бер бәйләм хат **2.** ҡап, пачка; **па́чка ча́ю** бер ҡап сәй **3.** *театр.* пачка (*балериналарҙың сәхнә кейеме*) **4.** *горн.* ҡатлам, ҡатлау **5.** *в знач. нареч.* **па́чками**; *разг.* төркөм-төркөм, ҡосаҡ-ҡосаҡ, бер-бер артлы

**ПА́ЧКАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* бысратыу; **па́чкать ру́ки** ҡулдарҙы бысратыу **2.** *разг.* (*делать что-л. неумело, небрежно — преимущественно рисовать, писать*) буяу, бысратыу; **он не рису́ет, а па́чкает** ул рәсем төшөрмәй, бысрата ғына **3.** *перен.* тап төшөрөү, бысратыу; **па́чкать и́мя** исемгә тап төшөрөү

**ПА́ЧКАТЬСЯ** *несов.* **1.** бысраныу, буялыу; **све́тлое бы́стро па́чкается** аҡһыл төҫтәге әйбер тиҙ бысрана **2.** *перен., разг., презр.* бысраныу; **па́чкаться не хо́чется** бысранғы килмәй (*насар эштә ҡатнашырға теләмәү*) **3.** *страд. от* **па́чкать**

**ПАЧКОТНЯ́** *ж*; *разг., презр.* бысраҡ эшләнгән эш

**ПАЧКУ́Н** *м* и **ПАЧКУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* **1.** бысратыусы **2.** *презр.* рәссам (яҙыусы) ишараты

**ПАША́** *м* паша (*Төркиәлә, Мысырҙа һәм ҡайһы бер мосолман илдәрендә юғары сановниктарға бирелә торған хөрмәтле титул һәм шул титулды йөрөткән кеше*)

**ПА́ШНЯ** *ж* һөрөлгән ер

**ПАШТЕ́Т** *м* паштет (*ашамлыҡ*); **печёночный паште́т** бауыр паштеты

**ПА́ЮСНЫЙ: па́юсная икра́** паюслы ыуылдырыҡ (*бикре кеүек балыҡтарҙың ҡҙенә бер төрлө итеп әҙерләнгән ҡара ыуылдырығы*)

**ПАЯ́ЛЬНИК** *м* паяльник

**ПАЯ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое паять итеү …ы; **пая́льная ла́мпа** паять итеү лампаһы

**ПАЯ́ЛЬЩИК** *м* паятлаусы

**ПАЯ́СНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* кәмитләнеү, ҡылансыҡланыу

**ПАЯ́ТЬ** *несов. что* паятлау, (ҡурғаш) иретеп йәбештереү (ямау), йәбештереү, паять итеү

**ПАЯ́Ц** *м*; *разг.* кәмитсе, мәҙәксе

**ПЕВЕ́Ц** *м* **1.** йырсы, йыраусы; **о́перный певе́ц** опера йырсыһы **2.** *перен.* мәҙхиәсе, маҡтап йырлаусы; **певе́ц наро́дного сча́стья** халыҡ бәхетен маҡтап йырлаусы

**ПЕВИ́ЦА** *ж см.* **певе́ц** 1

**ПЕВУ́ЧЕСТЬ** *ж* моңлолоҡ, көйлөлөк, аһәңлелек

**ПЕВУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** (*любящий петь*) йырсы, йырларға яратыусы; **певу́чий наро́д** йырларға яратыусы халыҡ **2.** (*напевный*) моңло, көйлө; **певу́чий го́лос** моңло тауыш

**ПЕ́ВЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** йырсы …ы; **пе́вческая ко́мната** йырсы бүлмәһе **2.** йырлау …ы; **пе́вческие да́нные** йырлау һәләте

**ПЕ́ВЧИЙ,** -ая, -ее **1.** һайрар; **пе́вчие пти́цы** һайрар ҡоштар **2.** *в знач. сущ.* **пе́вчий** *м* йырсы (*сиркәү хорында*)

**ПЕ́ГИЙ,** -ая, -ое (*о масти лошади*) ала, алмасыбар

**ПЕДАГО́Г** *м* педагог

**ПЕДАГО́ГИКА** *ж* педагогика (*тәрбиә һәм белем биреү тураһындағы фән*)

**ПЕДАГОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое педагогик, педагогия …ы; **педагоги́ческий сове́т** педагогик совет; **педагоги́ческий тала́нт** педагогик талант

**ПЕДАГОГИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое педагогикаға ярашлы, педагогик яҡтан дөрөҫ; **педагоги́чный посту́пок** педагогик яҡтан дөрөҫ ҡылыҡ

**ПЕДА́ЛЬ** *ж* педаль, тәбәлдерек; **педа́ль велосипе́да** велосипед педале; **педа́ль тока́рного станка́** токарь станогы тәбәлдереге

**ПЕДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** педаль …ы, тәбәлдерек …ы; **педа́льный механи́зм** тәбәлдерек механизмы **2.** педалле, тәбәлдерекле; **де́тский педа́льный автомоби́ль** балалар өсөн тәбәлдерекле автомобиль

**ПЕДА́НТ** *м* педант (*фәндә һәм тормошта формаль яҡҡа ныҡ иғтибар биргән кеше*)

**ПЕДАНТИ́ЗМ** *м* педантизм (*берәй нәмәлә артыҡ формализм, ваҡсыллыҡ, ныҡ аныҡлыҡ*)

**ПЕДАНТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое педантик, педант, үтә ваҡсыл; **педанти́ческое отноше́ние** педантик мөнәсәбәт; **педанти́ческая аккура́тность** педантик теүәллек

**ПЕДАНТИ́ЧНОСТЬ** *ж* педантлыҡ; **отлича́ться педанти́чностью** педантлыҡ менән айырылыу

**ПЕДАНТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **педанти́ческий**; **педанти́чный челове́к** үтә ваҡсыл кеше

**ПЕДЕРА́СТИЯ** *ж* педерастия (*ирҙәр араһындағы енси мөнәсәбәт*)

**ПЕДИА́ТР** *м* педиатр (*балалар табибы*)

**ПЕДИАТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое педиатрик, педиатрия …ы; **педиатри́ческий институ́т** педиатрик институт

**ПЕДИАТРИ́Я** *ж* педиатрия (*балалар анатомияһын һәм физиологияһын, уларҙың ауырыуын дауалау һәм иҫкәртеү юлдарын өйрәнә торған фән*)

**ПЕДИКЮ́Р** *м* педикюр (*аяҡ тырнағын матурлау һәм сөйәлде бөтөрөү*)

**ПЕДИКЮ́РНЫЙ,** -ая, -ое педикюр ...ы; **педикю́рный кабине́т** педикюр кабинеты

**ПЕДИКЮ́РША** *ж* педикюрша (*педикюр яһаусы ҡатын-ҡыҙ*)

**ПЕДИНСТИТУ́Т** *м* (*педагогический институт*) пединститут

**ПЕДСОВЕ́Т** *м* (*педагогический совет*) педсовет; **заседа́ние педсове́та** педсовет ултырышы

**ПЕДУЧИ́ЛИЩЕ** *с* (*педагогическое училище*) педучилище

**ПЕЙЗА́Ж** *м* пейзаж (**1.** *тәбиғәт күренеше* **2.** *тәбиғәт күренешен кәүҙәләндергән һүрәт* **3.** *әҙәби әҫәрҙә тәбиғәтте тасуирлау*); **го́рный пейза́ж** тау пейзажы; **нарисова́ть пейза́ж** пейзаж төшөрөү; **пейза́ж в рома́не** романдағы пейзаж

**ПЕЙЗАЖИ́СТ** *м* пейзажсы (*пейзаж төшөрөүсе рәссам*)

**ПЕЙЗА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое пейзаж ...ы; **пейза́жная вы́ставка** пейзаж күргәҙмәһе; **пейза́жные карти́ны** пейзаж һүрәттәре

**ПЕКА́РНЫЙ,** -ая, -ое икмәк бешереү ...ы; **пека́рное де́ло** икмәк бешереү эше

**ПЕКА́РНЯ** *ж* пекарня, икмәкхана

**ПЕ́КАРЬ** *м* икмәк бешереүсе

**ПЕКЛЕВА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ваҡ тартып иләнгән (*күберәк арыш онона ҡарата*); **пеклева́нная мука́** ваҡ тартып иләнгән он **2.** ваҡ тартып иләнгән ондан (бешерелгән); **пеклева́нный хлеб** ваҡ тартып иләнгән ондан бешерелгән икмәк

**ПЕКЛЕВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* ваҡ тартып иләү (*күберәк арыш онон*)

**ПЕ́КЛО** *с*; *разг.* **1.** (*зной, жара*) үтә ҡыҙыу, үтә эҫе **2.** *перен.* ҡыҙыу барған урыны, ут эсе (*һуғыштың, бәхәстең һ.б.*); **пе́кло бо́я** һуғыштың ҡыҙыу барған урыны

**ПЕЛЕНА́** *ж* япма, пәрҙә; **пелена́ тума́на** томан пәрҙәһе ♦ **(сло́вно, то́чно) пелена́ (с глаз) упа́ла** күҙе асылып киткәндәй булды (*хатаһын, яңылышҡанын ҡапыл ғына аңлаған кешегә ҡарата әйтелә*)

**ПЕЛЕНА́НИЕ** *с см.* **пелена́ть**

**ПЕЛЕНА́ТЬ** *несов. кого-что* биләү; **пелена́ть ребёнка** баланы биләү

**ПЕ́ЛЕНГ** *м*; *спец.* пеленг (*компас теле менән күренгән нәмәгә йәки ишетелгән тауышҡа ҡараған йүнәлеш араһындағы мөйөш*)

**ПЕЛЕНГА́ТОР** *м*; *спец.* пеленгатор (*пеленгылай торған прибор*); **опти́ческий пеленга́тор** оптик пеленгатор; **звуково́й пеленга́тор** тауыш пеленгаторы

**ПЕЛЕНГА́ЦИЯ** *ж*; *спец.* пеленгылау; **произвести́ пеленга́цию** пеленгылау үткәреү

**ПЕЛЕНГОВА́НИЕ** *с*; *спец. см.* **пеленгова́ть**

**ПЕЛЕНГОВА́ТЬ** *сов., несов. что*; *спец.* пеленгылау (*пеленгыны табып, ниҙеңдер урынын билдәләү*); **пеленгова́ть радиоста́нцию** радиостанцияны пеленгылау

**ПЕЛЁНКА** *ж* йүргәк, биләү ♦ **с пелёнок** биләүҙән үк, бала (сабый) саҡтан уҡ

**ПЕЛЕРИ́НА** *ж* пелерина (**1.** *яурынға һалып йөрөй торған ҡыҫҡа япынса* **2.** *шундай япынса рәүешендәге яға*)

**ПЕЛИКА́Н** *м* пеликан, баба ҡошо

**ПЕЛЬМЕ́НИ** *мн.* (*ед.* **пельме́нь** *м*) билмән

**ПЕЛЬМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** билмән ...ы; **пельме́нное те́сто** билмән ҡамыры **2.** *в знач. сущ.* **пельме́нная** *ж* билмәнхана

**ПЕ́МЗА** *ж* пемза, күбек таш

**ПЕ́МЗОВЫЙ,** -ая, -ое пемза ...ы, күбек таш ...ы; **пе́мзовый порошо́к** күбек таш онтағы

**ПЕ́НА** *ж* күбек; **морска́я пе́на** диңгеҙ күбеге; **мы́льная пе́на** һабын күбеге ♦ **с пе́ной у рта** ауыҙынан төкөрөк сәсеп (*бик ныҡ асыуланыу, ярһыу*)

**ПЕНА́Л** *м* пенал

**ПЕНА́ЛЬТИ** *м нескл.*; *спорт.* пенальти (*футболда, хоккейҙа һ.б. уйындарҙа ҡапҡаға штраф туп йәки шайба бәреү*)

**ПЕНА́ТЫ** *мн.*; *уст.* тыуған йорт, төп йорт; **верну́ться к родны́м пена́там** төп йортҡа ҡайтыу

**ПЕ́НИЕ** *с* **1.** йырлау, һайрау; **пе́ние в о́пере** операла йырлау; **пе́ние соловья́** һандуғас һайрауы **2.** йыр ...ы; **уро́к пе́ния** йыр дәресе

**ПЕ́НИСТЫЙ,** -ая, -ое күбекле, күбекләнеп торған (яткан); **пе́нистые во́лны** күбекләнеп торған тулҡындар; **пе́нистый шампу́нь** күбекле шампунь

**ПЕ́НИТЬ** *несов. что* күбекләндереү, күпертеү

**ПЕ́НИТЬСЯ** *несов.* күбекләнеү, күпереү

**ПЕНИЦИЛЛИ́Н** *м* пенициллин

**ПЕ́НКА I** *ж* ҡаҫмаҡ, шекәрә; **молоко́ с пе́нками** ҡаҫмаҡлы һөт

**ПЕ́НКА II** *ж* пенка, тау күне (*утҡа сыҙамлы, күҙәнәкле еңел минерал*); **мундшту́к из пе́нки** пенка мөштөк

**ПЕ́ННИ** *с нескл.* **1.** *см.* **пенс 2.** пенни (*фин маркаһының йөҙҙән берәнә тиң ваҡ аҡса*)

**ПЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое күбекле, күбекләнеп торған; **пе́нные во́лны** күбекләнеп торған тулҡындар

**ПЕНОПЛА́СТ** *м* пенопласт (*күҙәнәкле пластмасса*)

**ПЕНОПЛА́СТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** пенопласт ...ы; **пенопла́стовый цех** пенопласт цехы **2.** пенопласт, пенопластан эшләнгән; **пенопла́стовые игру́шки** пенопласт уйынсыҡтар

**ПЕ́НОЧКА** *ж* һарыҡас турғай

**ПЕНС** *м* пенс (*шиллингының ун икенән берәнә тиң ваҡ инглиз аҡсаһы*)

**ПЕНСИОНЕ́Р** *м* и **ПЕНСИОНЕ́РКА** *ж* пенсионер

**ПЕНСИО́ННЫЙ,** -ая, -ое пенсия ...ы; **пенсио́нная кни́жка** пенсия кенәгәһе; **пенсио́нный во́зраст** пенсия йәше

**ПЕ́НСИЯ** *ж* пенсия; **пе́нсия за вы́слугу лет** тейешле йылдар хеҙмәт иткән өсөн пенсия; **вы́йти на пе́нсию** пенсияға сығыу

**ПЕНСНЕ́** *с нескл.* пенсне (*тирәсһеҙ, танау биленә ҡыҫтырып ҡуя торған күҙлек*)

**ПЕНЬ** *м* төп, түңгәк; **корчева́ть пни** төптәрҙе аҡтарыу ♦ **как пень (стоя́ть)** бағана кеүек (ҡатып ҡалыу); **вали́ть че́рез пень коло́ду** илке-һалҡы ғына, яй эшләү

**ПЕНЬКА́** *ж* киндер (тарма) сүсе, сүс

**ПЕНЬКО́ВЫЙ,** -ая, -ое сүс, сүстән эшләнгән; **пенько́вый кана́т** сүс арҡан

**ПЕНЬЮА́Р** *м* пеньюар (**1.** *еңел туҡыманан тегелгән ҡатын-ҡыҙ халаты* **2.** *бөҙрәханала клиенттың кейеме өҫтөнә ябыла торған япма*)

**ПЕ́НЯ** *ж* (*штраф*) пеня; **начи́слить пе́ню** пеня һалыу; **плати́ть пе́ню** пеня түләү

**ПЕНЯ́ТЬ** *несов. на кого-что*; *разг.* үпкәләү ♦ **не́чего на зе́ркало пеня́ть, ко́ли ро́жа крива́** ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә; **пеня́й на себя́** үҙеңә үпкәлә

**ПЕ́ПЕЛ** *м* көл ♦ **обрати́ть в пе́пел** көлгә әйләндереү, яндырып бөтөрөү; **обрати́ться в пе́пел** көлгә әйләнеү, янып бөтөү; **подня́ть из пе́пла** харабанан (емерек хәлдән) күтәреү

**ПЕПЕЛИ́ЩЕ** *с* **1.** янғын урыны, үртәнде **2.** *уст.*, *высок.* (*отчий дом*) тыуған йорт; **верну́ться на родно́е пепели́ще** тыуған йортоңа ҡайтыу

**ПЕ́ПЕЛЬНИЦА** *ж* көл һауыты

**ПЕ́ПЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көл ...ы; **пе́пельные ку́чи** көл өйөмдәре **2.** (*о цвете*) аҡһыл һоро, көл төҫөндәге

**ПЕПСИ́Н** *м*; *физиол.* пепсин (*аҙыҡтағы аҡһымдарҙы тарҡатыусы ашҡаҙан һуты*)

**ПЕРВЕ́ЙШИЙ,** -ая, -ее *разг.* **1.** иң беренсе, иң әһәмиәтле (мөһим) **2.** (*лучший*) иң яҡшы, иң юғары

**ПЕ́РВЕНЕЦ** *м* **1.** баш бала, беренсе бала **2.** *чего, какой*; *перен.* беренсеһе, беренсе (тәүге) эш (хеҙмәт); **э́та кни́га — мой пе́рвенец** был китап — минең тәүге хеҙмәтем

**ПЕ́РВЕНСТВО** *с* беренселек, алдынғылыҡ; **пе́рвенство ми́ра по ша́хматам** шахмат буйынса донъя беренселеге; **завоева́ть пе́рвенство** беренселекте яулап алыу

**ПЕ́РВЕНСТВОВАТЬ** и *уст.* **ПЕРВЕНСТВОВА́ТЬ** *несов.* беренселекте тотоу, алдын (өҫтөн) булыу

**ПЕРВИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** беренсел, беренсе, тәүге; **перви́чная обрабо́тка мета́лла** металдың беренсел эшкәртелеүе; **перви́чный пери́од разви́тия** үҫештең тәүге осоро **2.** (*основной*) төп, тәү, беренсел; **перви́чные при́знаки боле́зни** ауырыуҙың тәү билгеләре **3.** (*низовой*) түбәнге, башланғыс; **перви́чная профсою́зная организа́ция** түбәнге профсоюз ойошмаһы

**ПЕРВОБЫТНООБЩИ́ННЫЙ,** -ая, -ое тәүтормош йәмғиәт ...ы; **первобытнообщи́нный строй** тәүтормош йәмғиәт ҡоролошо

**ПЕРВОБЫ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәүтормош ...ы; **первобы́тный челове́к** тәүтормош кешеһе **2.** ҡырағай, артта ҡалған; **первобы́тные нра́вы** ҡырағай ғөҙәттәр **3.** ҡул теймәгән, кеше аяғы баҫмаған; **первобы́тный лес** кеше ҡулы теймәгән урман **4.** боронғо; **первобы́тные живо́тные** боронғо хайуандар

**ПЕРВОГО́ДОК** *м*; *разг.* **1.** бер йәше тулмаған, беренсе йәше менән барған; **телёнок-первого́док** бер йәше тулмаған быҙау **2.** беренсе йыл хеҙмәт иткән; **солда́ты-первого́дки** беренсе йыл хеҙмәт иткән һалдаттар

**ПЕРВОЗДА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** иң тәүге, иң боронғо; **первозда́нные масси́вы гор** тауҙарҙың иң боронғо массивтары **2.** саф, ҡул теймәгән, кеше аяғы баҫмаған; **первозда́нная синева́ не́ба** күктең саф зәңгәрлеге ♦ **первозда́нный ха́ос** *ирон.* боронғо хаос

**ПЕРВОИСТО́ЧНИК** *м* беренсе (тәү) сығанаҡ, төп сығанаҡ

**ПЕРВОКЛА́ССНИК** *м* и **ПЕРВОКЛА́ССНИЦА** *ж* беренсе синыф уҡыусыһы, беренсе синыфта уҡыусы

**ПЕРВОКЛА́ССНЫЙ,** -ая, -ое беренсе дәрәжәләге, иң яҡшы, юғары сифатлы; **первокла́ссное обору́дование** юғары сифатлы ҡорамалдар; **первокла́ссный ма́стер** иң яҡшы оҫта

**ПЕРВОКУ́РСНИК** *м* и **ПЕРВОКУ́РСНИЦА** *ж* беренсе курс студенты, беренсе курста уҡыусы студент

**ПЕРВОМА́Й** *м*; *высок.* Беренсе май, Беренсе май байрамы

**ПЕРВОМА́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Беренсе май ...ы; **первома́йская демонстра́ция** Беренсе май демонстрацияһы

**ПЕРВОНАЧА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәүге, баштағы, иң беренсе; **первонача́льный прое́кт** тәүге проект **2.** башланғыс, беренсе; **первонача́льное обуче́ние** башланғыс белем биреү **3.** (*элементарный*) иң ябай, башланғыс; **первонача́льные све́дения по арифме́тике** арифметиканан башланғыс мәғлүмәттәр

**ПЕРВООСНО́ВА** *ж* төп (асыл) нигеҙ, башланғыс; **мате́рия — первоосно́ва всего́ существу́ющего** материя — донъялағы һәр нәмәнең төп нигеҙе

**ПЕРВООТКРЫВА́ТЕЛЬ** *м* беренсе (тәү башлап) асыусы (*яңы ерҙәрҙе, илдәрҙе һ.б.*)

**ПЕРВООЧЕРЕДНО́Й** и **ПЕРВООЧЕРЁДНЫЙ,** -ая, -ое беренсе сираттағы, беренсе нәүбәттәге, кисектергеһеҙ; **первоочередна́я зада́ча** беренсе сираттағы бурыс

**ПЕРВОПЕЧА́ТНИК** *м* тәү башлап китап баҫыусы

**ПЕРВОПЕЧА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәү башлап (беренсе булып) баҫылған; **первопеча́тные кни́ги** тәү башлап баҫылған китаптар **2.** беренсе (тәүге) тапҡыр баҫылған, тәүге баҫма; **первопеча́тные те́ксты** беренсе тапҡыр баҫылған текстар

**ПЕРВОПРИЧИ́НА** *ж* төп (беренсе) сәбәп

**ПЕРВОПРОХО́ДЕЦ** *м* башлап юл ярыусы, беренсе юл һалыусы; **первопрохо́дец ко́смоса** йыһанға башлап юл ярыусы

**ПЕРВОПУ́ТОК** *м*; *разг.* тәүге сана юлы

**ПЕРВОРАЗРЯ́ДНИК** *м* и **ПЕРВОРАЗРЯ́ДНИЦА** *ж* беренсе разрядлы спортсы

**ПЕРВОРАЗРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое беренсе разрядлы, бик яҡшы (шәп); **перворазря́дный рестора́н** беренсе разрядлы ресторан

**ПЕРВОРОДЯ́ЩАЯ 1.** тәүгә бала табыусы, тәүге балаһын аҫраған **2.** *в знач. сущ.* **первородя́щая** *ж* тәүгә бала табыусы (тәүгә балаһын аҫраған) ҡатын

**ПЕРВОСО́РТНЫЙ,** -ая, -ое беренсе сорт(лы); **первосо́ртная мука́** беренсе сортлы он

**ПЕРВОСТЕПЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое беренсе дәрәжәләге, иң мөһим, төп; **первостепе́нная зада́ча** иң мөһим бурыс

**ПЕРВОТЁЛКА** *ж*; *с.-х.* тана һыйыр, тәүгә быҙаулаған һыйыр

**ПЕРВОТЕ́ЛЬНАЯ** *с.-х.* беренсегә (тәүгә) быҙаулаған тана

**ПЕРВОЦВЕ́Т** *м* **1.** яҙ гөлө, кәкүк емеше **2.** *собир.*; *сад.* (*цветки, появившиеся впервые в жизни данного растения*) тәүсәскә

**ПЕ́РВЫЙ,** -ая, -ое **1.** *числ.* беренсе; **пе́рвый день ме́сяца** айҙың беренсе көнө; **пе́рвый но́мер журна́ла** журналдың беренсе һаны; **пе́рвый курс** беренсе курс **2.** тәүге, беренсе; **пе́рвое впечатле́ние** тәүге тәьҫир; **суд пе́рвой инста́нции** беренсе инстанциялағы суд; **пе́рвый снег** тәүге ҡар; **пе́рвая парова́я маши́на** беренсе пар машинаһы; **пе́рвый поцелу́й** тәүге үбешеү **3.** беренсе, юғары, иң, төп; **пе́рвая краса́вица** иң сибәр ҡатын-ҡыҙ; **пе́рвый сорт** беренсе сорт; **игра́ть пе́рвые ро́ли** төп ролдәрҙе уйнау **4.** *в знач. сущ.* **пе́рвое** *с* беренсе; **пода́ть на пе́рвое борщ** беренсегә борщ килтереү ♦ **пе́рвые петухи́** тәүге әтәстәр; **пе́рвая по́мощь** тәүге ярҙам; **в пе́рвую го́лову** барыһынан элек, тәүге сиратта; **в пе́рвую мину́ту** башта уҡ; **на пе́рвых пора́х** башта, элек; **не пе́рвой мо́лодости** йәш түгел, йәше уҙған (үтеп барған); **не пе́рвой све́жести** шаҡтай иҫкергән, иҫке төҫ ингән; **пе́рвый блин ко́мом** беренсе ҡоймаҡ табаға йәбешә (*берәй эштең уңышһыҙ башланып китеүенә ҡарата*); **игра́ть пе́рвую скри́пку** мөһим урын тотоу, башлап йөрөү, берәй эштә төп ролде уйнау; **пе́рвым де́лом** иң тәүҙә, иң элек, башта; **с пе́рвого взгля́да** бер күреүҙә

**ПЕРГА́** *ж*; *пчел.* һитә, манса

**ПЕРГА́МЕНТ** и *спец.* **ПЕРГА́МЕН** *м* пергамент, пергамен (**1.** *борон яҙыу өсөн ҡулланылған ҡағыҙ кеүек йоҡа аҡ күн* **2.** *шундай күнгә яҙылған боронғо ҡульяҙма* **3.** *май, һыу үткәрмәй торған йылтыр ҡағыҙ*)

**ПЕРГА́МЕНТНЫЙ** и *спец.* **ПЕРГА́МЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** пергамент …ы; **перга́ментный сви́ток** пергамент төргәге **2.** пергамент; **перга́ментная бума́га** пергамент ҡағыҙ

**ПЕРЕАДРЕСОВА́ТЬ** *сов. что* бүтән адрес менән ебәреү, яңы адресҡа ебәреү

**ПЕРЕАДРЕСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **переадресова́ть**

**ПЕРЕАТТЕСТА́ЦИЯ** *ж см.* **переаттестова́ть** — **переаттесто́вывать**; **переаттеста́ция преподава́телей** уҡытыусыларҙы яңынан аттестациялау

**ПЕРЕАТТЕСТОВА́ТЬ** *сов. кого-что* яңынан аттестациялау

**ПЕРЕАТТЕСТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **переаттестова́ть**

**ПЕРЕБАЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* (яңы урынға, ергә) күсереү (урынлаштырыу); **перебази́ровать заво́д в Сиби́рь** заводты Себергә күсереү

**ПЕРЕБАЗИ́РОВАТЬСЯ** *сов.*, *несов.* (яңы урынға, ергә) күсеү (урынлашыу)

**ПЕРЕБАЛЛОТИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* яңынан тауышҡа ҡуйыу, ҡабаттан һайлау

**ПЕРЕБАЛЛОТИ́РОВАТЬСЯ** *сов.* яңынан тауышҡа ҡуйылыу, ҡабаттан һайланыу

**ПЕРЕБА́РЩИВАТЬ** *несов. см.* **переборщи́ть**

**ПЕРЕБЕГА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **перебежа́ть** **2.** (*быстро перемещаться — о тени, свете, отражении и т.п.*) күсеү, күсеп йөрөү

**ПЕРЕБЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *что*, *через что* аша (арҡыры) йүгереп сығыу (үтеү); **перебежа́ть че́рез у́лицу** урам аша йүгереп сығыу **2.** (*бегом переместиться на другое место*) йүгереп күсеү **3.** (*о глазах, взгляде*) йүгертеү; **перебежа́ть глаза́ми** күҙ йүгертеү **4.** *разг.* (*перейти на сторону врага*) ҡасып сығыу

**ПЕРЕБЕ́ЖКА** *ж* йүгереп үтеү, йүгереп күсеү; **де́лать перебе́жки** билдәле бер араны йүгереп үтеү

**ПЕРЕБЕ́ЖЧИК** *м* и **ПЕРЕБЕ́ЖЧИЦА** *ж* дошман яғына ҡасып сығыусы, һатлыҡ

**ПЕРЕБЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **перебели́ть**

**ПЕРЕБЕЛИ́ТЬ** *сов. что* яңынан (ҡабаттан) ағартыу

**ПЕРЕБЕСИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о животных*) ҡотороҡ менән ауырыу **2.** *разг.* (*прийти в состояние крайнего раздражения*) ҡотороноу, шашыу; **весь наро́д бу́дто перебеси́лся** барса халыҡ, әйтерһең, ҡоторонған **3.** *прост.* (*остепениться*) аҡылға ултырыу, баҫалҡыланыу

**ПЕРЕБИВА́ТЬ** *несов. см.* **переби́ть**

**ПЕРЕБИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переби́ться** **2.** *страд. от* **перебива́ть**

**ПЕРЕБИНТОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*забинтовать заново*) бинт менән яңынан бәйләү

**2.** *кого* (*забинтовать раны всем, многим*) бинт менән бәйләп сығыу; **перебинтова́ть всех ра́неных** яралыларҙың барыһын да бинт менән бәйләп сығыу **3.** *кого-что-л.* (*забинтовать целиком*) бинт менән сырмау (урау)

**ПЕРЕБИРА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **перебра́ть 2.** *что* (*струны, клавиши, лады и т.п.*) сирткеләү, баҫҡылау; **перебира́ть стру́ны гита́ры** гитара ҡылдарын сирткеләү **3.** *что* (*теребить*) тартҡылау, ыуғылау, йолҡҡолау; **перебира́ть лён** етенде йолҡҡолау **4.** тыпырсыныу, тыпыр-тыпыр килеү; **перебира́ть нога́ми** аяҡ менән тыпыр-тыпыр килеү

**ПЕРЕБИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перебра́ться 2.** *страд. от* **перебира́ть** 1—3

**ПЕРЕБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* үлтереп (ҡырып) бөтөрөү **2.** *что* ватып (ҡырып, емереп) бөтөрөү; **переби́ть посу́ду** һауыт-һабаны ҡырып бөтөрөү **3.** *что* (һуғып) һындырыу; **переби́ть ру́ку** ҡулды һуғып һындырыу **4.** *кого-что* (*прервать*) бүлдереү, өҙөү; **переби́ть вопро́сом** *кого-л. кемделер* һорау биреп бүлдереү **5.** *кого-что*; *разг.* (*перехватить*) араға инеү, арҡыры төшөү; **переби́ть поку́пку** араға инеп һатып алыу (*берәү алырға торғанда, артыҡ биреп*) **6.** *что* (*нарушить течение, проявление чего-л.*) боҙоу; **переби́ть аппети́т** аппетитты боҙоу **7.** *что* (*заглушить*) баҫып китеү, еңеү; **за́пах полы́ни переби́л други́е за́пахи** әрем еҫе башҡа еҫтәрҙе еңде **8.** *что* (*вбить в другое место*) күсереп ҡағыу; **переби́ть гвоздь** сөйҙө күсереп ҡағыу **9.** *что* (*взбить заново*) ҡабартыу, өлпәйтеү; **переби́ть поду́шки** мендәрҙәрҙе ҡабартыу **10.** *что* (*обить заново*) яңынан көпләү ♦ **переби́ть доро́гу** юлға арҡыры сығыу

**ПЕРЕБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ватылып (ҡырылып) бөтөү **2.** *разг.* (*с трудом прожить*) тартып-һуҙып еткереү

**ПЕРЕБО́Й** *м* **1.** тигеҙһеҙ тибеш; **перебо́и в се́рдце** йөрәктең тигеҙһеҙ тибеше **2.** тотҡарлыҡ, өҙөклөк; **перебо́и в рабо́те** эштәге өҙөклөктәр

**ПЕРЕБОЛЕ́ТЬ** *сов. чем* и *без доп.* **1.** ауырып алыу, ауырыу кисереү, (ауырыуҙы) үткәреү; **переболе́ть воспале́нием лёгких** үпкә шешеүен үткәреү **2.** күп ауырыу кисереү; **ребёнок переболе́л мно́гими боле́знями** бала күп ауырыуҙар кисерҙе

**ПЕРЕБО́Р** *м*; *разг.* **1.** *см.* **перебира́ть** 2; **2.** *карт.* перебор

**ПЕРЕБО́РКА I** *ж см.* **перебра́ть — перебира́ть** 1, 3

**ПЕРЕБО́РКА II** *ж* бүлге; **доща́тая перебо́рка** таҡта бүлге

**ПЕРЕБОРОНИ́ТЬ** *сов. что* ҡабаттан (яңынан) тырматыу; **переборони́ть па́шню** һөрөлгән ерҙе ҡабаттан тырматыу

**ПЕРЕБОРОНОВА́ТЬ** *сов. что см.* **переборони́ть**

**ПЕРЕБОРО́ТЬ** *сов. кого-что*; *прям., перен.* еңеп сығыу, еңеү; **переборо́ть проти́вника** дошманды еңеп сығыу; **переборо́ть уста́лость** арығанлыҡты еңеү

**ПЕРЕБОРЩИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* арттырып (шаштырып, аштырып) ебәреү

**ПЕРЕБРА́НИВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* әрләшеп (ирәгәләшеп, талашып, ирешеп, ыҙғышып) бөтөү

**ПЕРЕБРА́НКА** *ж*; *разг.* үҙ-ара әрләш (ыҙғыш, талаш), иреш, иреш-талаш; **зате́ять перебра́нку** иреш сығарыу

**ПЕРЕБРА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **перебро́сить**

**ПЕРЕБРА́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перебро́ситься 2.** *страд. от* **перебра́сывать**

**ПЕРЕБРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* берәмтекләп ҡарау, айырыу, һайлау; **перебра́ть пи́сьма** хаттарҙы берәмтекләп ҡарау; **перебра́ть карто́фель** картуф айырыу **2.** *кого-что*; *перен.* берәм-берәм иҫкә (хәтергә) төшөрөү, берәм-берәм хәтерҙән үткәреү; **перебра́ть в па́мяти собы́тия после́дних лет** һуңғы йылдарҙағы ваҡиғаларҙы берәм-берәм хәтергә төшөрөү **3.** *что*; *разг.* тағатып (таратып, һүтеп) йыйыу; **перебра́ть механи́зм часо́в** сәғәт механизмын һүтеп йыйыу **4.** *что*; *типогр.* (*набрать заново*) ҡабаттан (ҡайтанан) йыйыу; **перебра́ть строку́** бер юлды ҡайтанан йыйыу **5.** *что* (*взять постепенно, по частям*) ташыу, туҡтауһыҙ алыу; **он перебра́л у меня́ все карандаши́** ул бар ҡәләмдәремде ташып бөткән **6.** *что, чего* (*взять слишком много*) артыҡ (кәрәгенән тыш) алыу; **перебра́ть това́ров сверх но́рмы** тауарҙарҙы норманан тыш алыу

**ПЕРЕБРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** аша сығыу; **перебра́ться че́рез ре́ку** йылға аша сығыу **2.** (*переселиться*) күсенеү, күсеү, күсеп килеү (китеү); **перебра́ться на но́вую кварти́ру** яңы фатирға күсенеү

**ПЕРЕБРОДИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*быть готовым к употреблению после брожения*) әсеп етеү; **вино́ переброди́ло** шарап әсеп еткән **2.** (*стать излишне кислым после брожения*) ҡыртҡыуланыу, үтә әсеү; **мёд переброди́л** бал ҡыртҡыуланған

**ПЕРЕБРОСА́ТЬ** *сов. что* ташлап (бәреп, ырғытып) бөтөрөү; **перебоса́ть дрова́ в сара́й** утынды һарайға ырғытып бөтөрөү

**ПЕРЕБРО́СИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (аша) ташлау, ырғытыу; **перебро́сить мяч че́рез се́тку** тупты селтәр аша ташлау **2.** *что* һалыу; **перебро́сить мост че́рез ре́ку** йылға аша күпер һалыу **3.** *кого-что* (*переместить*) күсереү, күсереп урынлаштырыу; **перебро́сить войска́ на но́вый фронт** ғәскәрҙе яңы фронтҡа күсереү; **перебро́сить ка́дры** кадрҙарҙы күсереү **4.** *что* арыраҡ (йыраҡҡараҡ) ырғытыу; **перебро́сить мяч за черту́** тупты һыҙыҡтан арыраҡ ырғытыу

**ПЕРЕБРО́СИТЬСЯ** *сов.* **1.** (аша) һикереү, һикереп сығыу; **перебро́ситься че́рез забо́р** ҡойма аша һикереп сығыу **2.** күсеү, һикереү; **ого́нь пере-**

**бро́сился на сосе́дний дом** ут күрше йортҡа күсте **3.** *чем* ырғытышыу, атышыу (*бер-береңә*); **перебро́ситься мячо́м** туп ырғытышыу **4.** *чем*; *перен.* һөйләшеп (әйтешеп) алыу; **перебро́ситься не́сколькими слова́ми** бер-ике ауыҙ һүҙ әйтешеп алыу

**ПЕРЕБРО́СКА** *ж см.* **перебро́сить** – **перебра́сывать** 3, 4; **перебро́ска диви́зии** дивизияны күсереү

**ПЕРЕБУДИ́ТЬ** *сов. кого-что* уятыу, уятып бөтөү (сығыу); **перебуди́ть дете́й** балаларҙы уятып бөтөү

**ПЕРЕБЫВА́ТЬ** *сов.* **1.** (*побывать в разное время у кого-л.*) йөрөп (булып) сығыу, булып (килеп) китеү; **перебыва́ть у всех родны́х** бөтә туғандарҙы йөрөп сығыу **2.** (*побывать в разное время где-л.*) булып (килеп) китеү; **на вы́ставке перебыва́ло мно́го наро́ду** күргәҙмәлә күп халыҡ булып китте **3.** (*побывать всюду, во многих местах*) булыу, йөрөү; **где то́лько не перебыва́ли** ҡайҙа ғына булманыҡ

**ПЕРЕВА́Л** *м* **1.** *см.* **перевали́ть** 4; **2.** (*дорога через хребет*) артылыш, үткәүел

**ПЕРЕВА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **перевали́ть**

**ПЕРЕВА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перевали́ться** **2.** аушаңлау, алпаңлап атлау **3.** *страд. от* **перева́ливать**

**ПЕРЕВАЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* күсереү, күсереп тейәү; **перевали́ть мешки́ с маши́ны на воз** тоҡтарҙы машинанан йөккә күсереү **2.** *кого-что* (*свалить на другую сторону*) аша һалыу (төшөрөү, сығарыу) **3.** *кого-что* (*перевернуть, не поднимая*) (бер яҡтан икенсе яҡҡа) әйләндереү **4.** *что*, *через что* (*перейти*) артылыу, аша сығыу; **перевали́ть че́рез хребе́т** һырт артылыу **5.** *разг.* артыу, артып китеү, уҙыу, уҙып китеү; **температу́ра перевали́ла за со́рок** температура ҡырҡтан артып киткән **6.** *кому безл.*; *разг.* уҙыу, уҙып китеү, ашыу, ашып китеү; **ему́ перевали́ло за со́рок** уның йәше ҡырҡтан уҙған

**ПЕРЕВАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* әйләнеп (боролоп) ятыу; **перевали́ться на друго́й бок** икенсе ҡабырғаға әйләнеп ятыу **2.** *через что* тәгәрәп (ауып, йығылып) төшөү, сығыу; **перевали́ться че́рез забо́р** ҡойма аша сығыу

**ПЕРЕВА́ЛОЧНЫЙ**, -ая, -ое йөк күсереү ...ы, йөк күсереп тейәү ...ы; **перева́лочный пункт** йөк күсереп тейәү пункты

**ПЕРЕВА́РИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **перевари́ть** **2.** *кого-что*; *разг.* (*с отрицанием "не"*) ене һөймәү, күрә алмау; **не перева́ривать лжи** ялғанлыҡты ене һөймәү

**ПЕРЕВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перевари́ться** **2.** *страд. от* **перева́ривать**

**ПЕРЕВАРИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*сварить заново*) яңынан (ҡабаттан) бешереү (ҡайнатыу) **2.** (*проварив слишком долго, лишить нужных качеств*) нығ бешереү, оҙаҡ бешереү (ҡайнатыу); **перевари́ть яйцо́** йомортҡаны нығ бешереү **3.** (*усвоить в процессе пищеварения*) һеңдереү; **перевари́ть пи́щу** аш һеңдереү **4.** *перен.*, *разг.* (*воспринять*) һеңдереү, үҙләштереү

**ПЕРЕВАРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** үтә нығ бешеү, артыҡ оҙаҡ ҡайнау (бешеү), иҙелеп китеү; **лапша́ перевари́лась** туҡмас иҙелеп киткән **2.** һеңеү; **пи́ща перевари́лась** аш һеңде

**ПЕРЕВЕЗТИ́** *сов. кого-что* **1.** алып барып ҡуйыу, алып барыу, илтеп ҡуйыу, ташыу; **перевезти́ дете́й на да́чу** балаларҙы дачаға алып барып ҡуйыу **2.** *через что* аша (арҡыры) сығарыу (күсереү, ташыу); **перевезти́ че́рез ре́ку** йылға аша сығарыу

**ПЕРЕВЕРНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* түңкәреү, түңкәреп ҡуйыу, әйләндереү, әйләндереп ҡуйыу (һалыу); **переверну́ть бо́чку вверх дном** мискәне түңкәреп ҡуйыу; **переверну́ть поду́шку** мендәрҙе әйләндереп һалыу **2.** *что* икенсе яғын асыу; **переверну́ть страни́цу** биттең икенсе яғын асыу **3.** *что*; *разг.* аҡтарыу, аҫтын-өҫкә килтереү; **переверну́ть всё вверх дном** бөтәһенең аҫтын-өҫкә килтереү **4.** *что*; *перен.*, *разг.* тамырынан үҙгәртеү; **переверну́ть пре́жние поня́тия** элекке төшөнсәләрҙе тамырынан үҙгәртеү

**ПЕРЕВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** әйләнеү, әйләнеп ятыу; **переверну́ться на друго́й бок** икенсе яҡҡа әйләнеп ятыу **2.** (*опрокинуться*) түңкәрелеү

**ПЕРЕВЕРСТА́ТЬ** *сов. что*; *полигр.* яңынан (ҡабаттан) вёрсткалау

**ПЕРЕВЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **переверну́ть**

**ПЕРЕВЁРТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переверну́ться** **2.** *страд. от* **перевёртывать**

**ПЕРЕВЕ́С** *м* **1.** *см.* **переве́сить** II; **2.** *разг.* (*излишек в весе*) артығы, артҡаны; **доплати́ть за переве́с** артығына түләү **3.** *перен.* (*преимущество*) өҫтөнлөк; **получи́ть переве́с** өҫтөнлөк алыу

**ПЕРЕВЕ́СИТЬ I** *сов. что* (*повесить на другое место*) күсереп элеү; **переве́сить карти́ну** картинаны күсереп элеү

**ПЕРЕВЕ́СИТЬ II** *сов.* **1.** *кого-что* (*взвесить заново*) яңынан (ҡабаттан) үлсәү; **переве́сить груз** йөктө яңынан үлсәү **2.** *кого-что* (*превзойти в весе*) ауырыраҡ тартыу, баҫып китеү; **одна́ ча́ша весо́в переве́сила другу́ю** үлсәү тәрилкәһенең береһе ауырыраҡ тартты **3.** *что* и *без доп.*; *перен.*, *разг.* өҫтөн сығыу, өҫтөнлөк алыу; **мне́ние большинства́ переве́сило** күпселектең фекере өҫтөнлөк алды

**ПЕРЕВЕ́СИТЬСЯ** *сов.* һалынып ятыу (төшөү), аҫылыныу; **переве́ситься че́рез пери́ла** яндауырҙан һалынып төшөү

**ПЕРЕВЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* (аша) сығарыу, сығарып ҡуйыу; **перевести́ дете́й че́рез у́лицу** балаларҙы урам аша сығарып ҡуйыу **2.** *кого-что* күсереү; **перевести́ класс в другу́ю ко́мнату** синыфты икенсе бүлмәгә күсереү; **перевести́ студе́нта на тре́тий курс** студентты өсөнсө курсҡа күсереү; **перевести́ изда́тельство на хоз-**

**расчёт** нәшриәтте хужалыҡ иҫәбенә күсереү **3.** *что*; *перен.* бороу; **перевести́ разгово́р на друго́е** һүҙҙе икенсегә бороу **4.** *что* (*переслать деньги*) ебәреү, һалыу, күсереү; **перевести́ два миллио́на** ике миллион һум(ды) күсереү **5.** *что* тәржемә итеү, күсереү; **перевести́ с ру́сского на башки́рский** урыҫ теленән башҡорт теленә тәржемә итеү **6.** *что* күсереү, әйләндереү; **перевести́ фу́нты в килогра́ммы** ҡаҙаҡтарҙы килограмдарға әйләндереү **7.** *что* күсереп төшөрөү; **перевести́ рису́нок** һүрәтте күсереп төшөрөү **8.** *кого*; *разг.* (*истребить*) ҡырып (үлтереп) бөтөрөү; **перевести́ мыше́й** сысҡандарҙы ҡырып бөтөрөү **9.** *что*; *разг.* (*истратить*) тотоп бөтөрөү, әрәмшәрәм итеү, туҙҙырыу; **перевести́ все де́ньги** бөтә аҡсаны туҙҙырыу ♦ **перевести́ дух (дыха́ние)** иркен тын алыу, тын алып ҡалыу, хәл алыу

**ПЕРЕВЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** күсеү; **перевести́сь на другу́ю рабо́ту** бүтән эшкә күсеү **2.** *разг.* бөтөү, ҡороу; **не перевели́сь ещё у нас сказа́тели** беҙҙә әле сәсәндәр бөтмәгән **3.** (*о рисунке, переводной картинке и т.п.*) күсереп төшөрөлөү

**ПЕРЕВЕ́ШАТЬ I** *сов.* **1.** *что*; *разг.* элеп бөтөрөү; **переве́шать всё бельё** бөтә керҙе элеп бөтөрөү **2.** *кого* (*казнить*) аҫып бөтөрөү

**ПЕРЕВЕ́ШАТЬ II** *сов. что* **1.** (*взвесить всё*) үлсәп сығыу (бөтөрөү) **2.** (*взвесить заново*) яңынан (ҡабаттан) үлсәп сығыу

**ПЕРЕВЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **переве́сить** I

**ПЕРЕВЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **переве́сить** II, **переве́шать** II

**ПЕРЕВЕ́ШИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **переве́ситься 2.** *страд. от* **переве́шивать** I

**ПЕРЕВЕ́ШИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **переве́шивать** II

**ПЕРЕВИВА́ТЬ** *несов. см.* **переви́ть**

**ПЕРЕВИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переви́ться 2.** *страд. от* **перевива́ть**

**ПЕРЕВИДА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* күпте күреү (кисереү); **он мно́го перевида́л на своём веку́** ул үҙ ғүмерендә күпте күргән

**ПЕРЕВИНТИ́ТЬ** *сов. что* яңынан (ҡабаттан) бороп индереү

**ПЕРЕВИ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **перевинти́ть**

**ПЕРЕВИРА́ТЬ** *несов. см.* **пересра́ть**

**ПЕРЕВИ́ТЬ** *сов. что* **1.** үреү, ҡушып үреү; **переви́ть ко́сы ле́нтами** сәс толомдарын таҫма ҡушып үреү **2.** (*обвить что-л. вокруг чего-л.*) уратыу, сырмау, уратып (сырмап) алыу **3.** (*распустив, свить заново*) яңынан (ҡабаттан) үреү, яңынан (ҡабаттан) ишеү

**ПЕРЕВИ́ТЬСЯ** *сов.* уралып (сырмалып) бөтөү, уралып (сырмалып) үҫеү; **хмель переви́лся с черёмухой** ҡомалаҡ муйыл ағасына уралып үҫкән

**ПЕРЕВО́Д** *м* **1.** *см.* **перевести́** — **переводи́ть**, **перевести́сь** — **переводи́ться 2.** тәржемә; **во́льный перево́д** ирекле тәржемә; **досло́вный перево́д** һүҙмә-һүҙ тәржемә **3.** почта (телеграф, банк) аша күсерелгән (ебәрелгән) аҡса, перевод; **получи́ть перево́д на сто рубле́й** почта аша ебәрелгән йөҙ һум аҡсаны алыу ♦ **нет перево́ду (перево́да)** *кому-чему* бөтөрлөк түгел, һәр ваҡыт бар

**ПЕРЕВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **перевести́** ♦ **не переводя́ дыха́ния** тын да алмай, шунда уҡ

**ПЕРЕВОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перевести́сь 2.** *страд. от* **переводи́ть**

**ПЕРЕВОДНО́Й** и **ПЕРЕВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** перевод ...ы, аҡса күсереү (ебәреү) ...ы; **перево́дный бланк** аҡса күсереү бланкыһы **2.** тәржемә, тәржемә ителгән; **переводна́я литерату́ра** тәржемә әҙәбиәт **3.** күсереү ...ы; **переводно́й балл** күсереү балы **4.** күсермәле; **переводны́е карти́нки** күсермәле һүрәттәр **5.** *тех.* күсергес; **перево́дный кла́пан** күсергес клапан

**ПЕРЕВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тәржемәселек ...ы, тәржемәсе(ләр) ...ы; **перево́дческая рабо́та** тәржемәселек эше

**ПЕРЕВО́ДЧИК** *м* и **ПЕРЕВО́ДЧИЦА** *ж* тәржемәсе

**ПЕРЕВО́З** *м* **1.** *см.* **перевезти́** — **перевози́ть 2.** (*место переправы*) кисеү, һыу аша сығатор ған урын (*борам, кәмә менән*)

**ПЕРЕВОЗИ́ТЬ** *несов. см.* **перевезти́**

**ПЕРЕВО́ЗКА** *ж см.* **перевезти́** — **перевози́ть**; **перево́зка пассажи́ров** пассажирҙар ташыу

**ПЕРЕВО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **перево́зочный**; **перево́зный парохо́д** һыу аша сығарыусы пароход

**ПЕРЕВО́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое һыу аша сығарыусы (ташыусы), күсереү ...ы, ташыу ...ы, сығарыу ...ы; **перево́зочные сре́дства** ташыу саралары

**ПЕРЕВО́ЗЧИК** *м* һыу аша сығарыусы, ылаусы, йөк ташыусы

**ПЕРЕВОЛНОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* нык борсоу, борсоп бөтөрөү

**ПЕРЕВОЛНОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* нык борсолоу, борсолоп бөтөү

**ПЕРЕВООРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **перевооружи́ть**

**ПЕРЕВООРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перевооружи́ться 2.** *страд. от* **перевооружа́ть**

**ПЕРЕВООРУЖЕ́НИЕ** *с см.* **перевооружи́ть** — **перевооружа́ть**, **перевооружи́ться** — **перевооружа́ться**

**ПЕРЕВООРУЖИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** өр-яңынан (яңынан) ҡоралландырыу; **перевооружи́ть а́рмию и флот** армия һәм флотты өр-яңынан ҡоралландырыу **2.** яңы ҡорамал (материал, сара) менән тәьмин итеү (йыһазландырыу); **перевооружи́ть лёгкую промы́шленность** еңел сәнәғәтте яңы ҡорамал менән йыһазландырыу

**ПЕРЕВООРУЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** яңы ҡорал менән ҡоралланыу **2.** *чем* яңы ҡорамал менән йыһазландырылыу (тәьмин ителеү)

**ПЕРЕВОПЛОТИ́ТЬ** *сов. кого-что* башҡаса (бүтәнсә) кәүҙәләндереү, башҡа төҫ (форма, кәүҙәләнеш) биреү

**ПЕРЕВОПЛОТИ́ТЬСЯ** *сов.* башҡаса (бүтәнсә) кәүҙәләнеү, яңы төҫ (форма, кәүҙәләнеш) алыу

**ПЕРЕВОПЛОЩА́ТЬ** *несов. см.* **перевоплоти́ть**

**ПЕРЕВОПЛОЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перевоплоти́ться 2.** *страд. от* **перевоплоща́ть**

**ПЕРЕВОПЛОЩЕ́НИЕ** *с см.* **перевоплоти́ть — перевоплоща́ть, перевоплоти́ться — перевоплоща́ться**

**ПЕРЕВОРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **переверну́ть**

**ПЕРЕВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переверну́ться 2.** *страд. от* **перевора́чивать**

**ПЕРЕВОРО́Т** *м* **1.** ҡырҡа боролош (һынылыш); **переворо́т в нау́ке** фәндә ҡырҡа боролош **2.** түңкәрелеш, алмашыныу; **социа́льный переворо́т** социаль түңкәрелеш **3.** *см.* **переверну́ться** 1

**ПЕРЕВОРОШИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** әйләндереү; **переворошии́ть се́но** бесәнде әйләндереү **2.** аҡтарыу, аҫтын өҫкә килтереү; **переворошии́ть все бума́ги** бөтә ҡағыҙҙарҙы аҡтарыу **3.** *перен.* хәтергә (иҫкә) төшөрөү, күҙ алдына килтереү; **переворошии́ть в па́мяти про́шлое** үткәндәрҙе хәтергә төшөрөү **4.** *перен.* (*изменить*) үҙгәртеү, яңынан (ҡабаттан, ҡайтанан) төҙөү

**ПЕРЕВОСПИТА́НИЕ** *с см.* **перевоспита́ть**

**ПЕРЕВОСПИТА́ТЬ** *сов. кого-что* яңынан тәрбиәләү, яңыса тәрбиә биреү

**ПЕРЕВОСПИТА́ТЬСЯ** *сов.* яңынан тәрбиәләнеү, яңыса тәрбиә алыу

**ПЕРЕВОСПИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **перевоспита́ть, перевоспита́ться**

**ПЕРЕВОСПИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перевоспита́ться 2.** *страд. от* **перевоспи́тывать**

**ПЕРЕВРА́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* (*передавая, исказить*) боҙоп һөйләү (әйтеү) **2.** *прост.* (*превзойти кого-л. во вранье*) кем уҙарҙан алдашыу, күп алдашыу

**ПЕРЕВЫБИРА́ТЬ** *несов. см.* **перевы́брать**

**ПЕРЕВЫ́БОРНЫЙ,** -ая, -ое яңынан (ҡабаттан, ҡайтанан) һайлау ...ы; **перевы́борное собра́ние** ҡабаттан һайлау йыйылышы

**ПЕРЕВЫ́БОРЫ** *только мн.* яңынан (ҡабаттан, ҡайтанан) һайлау

**ПЕРЕВЫ́БРАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* яңынан (ҡабаттан, ҡайтанан) һайлау; **перевы́брать профко́м** профкомды ҡабаттан һайлау

**ПЕРЕВЫПОЛНЕ́НИЕ** *с см.* **перевы́полнить — перевыполня́ть**

**ПЕРЕВЫ́ПОЛНИТЬ** *сов. что* арттырып үтәү (тултырыу)

**ПЕРЕВЫПОЛНЯ́ТЬ** *несов. см.* **перевы́полнить**

**ПЕРЕВЯЗА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*наложить повязку*) бәйләү, бәйләп ҡуйыу; **перевяза́ть ра́ну** яраны бәйләү **2.** *что* (*обвязать со всех сторон*) уратып бәйләү (бәйләп ҡуйыу); **перевяза́ть чемода́н** сумаҙанды уратып бәйләү **3.** *кого-что* (*связать*) бәйләп сығыу, бәйләү; **перевяза́ть кни́ги в па́чки** китаптарҙы төргәккә бәйләп сығыу **4.** *что* (*завязать заново*) һүтеп (сисеп, тағатып) яңынан (ҡабаттан) бәйләү; **перевяза́ть ба́нт** бантты сисеп яңынан бәйләү

**ПЕРЕВЯЗА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** яраны (ауыртҡан урынды) бәйләү, бәйләтеү; **он перевяза́лся** ул яраһын бәйләтте **2.** билгә быуыу; **перевяза́ться кушако́м** билгә билбау быуыу

**ПЕРЕВЯ́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **перевяза́ть — перевя́зывать, перевяза́ться — перевя́зываться 2.** *разг.* (*то, чем перевязано что-л.*) бау, бәй

**ПЕРЕВЯ́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (яра) бәйләү ...ы; **перевя́зочный пункт** яра бәйләү пункты **2.** (яра) бәйләй торған; **перевя́зочный материа́л** яра бәйләй торған материал **3.** *в знач. сущ.* **перевя́зочная** *ж* яра бәйләү бүлмәһе

**ПЕРЕВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **перевяза́ть**

**ПЕРЕВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перевяза́ться 2.** *страд. от* **перевя́зывать**

**ПЕ́РЕВЯЗЬ** *ж* **1.** тартмайыл, иңбаш ҡайышы, ҡайыш; **пе́ревязь для са́бли** ҡылыс ҡайышы **2.** бәй; **рука́ на пе́ревязи** бәйле ҡул **3.** *см.* **перевя́зка** 2

**ПЕРЕВЯ́СЛО** *с*; *разг.* көлтә бауы

**ПЕРЕГА́Р** *м*; *разг.* **1.** һаҫыҡ еҫ (*янғандағы*); **таба́чный перега́р** тәмәке төтөнөнөң һаҫыҡ еҫе **2.** араҡы еҫе (*ауыҙҙағы*)

**ПЕРЕГИ́Б** *м* **1.** *см.* **перегну́ть — перегиба́ть** 1, 2; **2.** (*место сгиба*) бөгөлгән (бөкләнгән) урын **3.** *перен.* (*крайность*) артыҡлыҡ, арттырып ебәреү, самаһыҙлыҡ

**ПЕРЕГИБА́ТЬ** *несов. см.* **перегну́ть**

**ПЕРЕГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перегну́ться 2.** *страд. от* **перегиба́ть**

**ПЕРЕГЛА́ДИТЬ** *сов. что* **1.** (*выгладить заново*) яңынан (ҡабаттан) үтекләү **2.** (*выгладить всё*) үтекләп бөтөрөү (сығыу); **перегла́дить всё бельё** бөтә керҙе үтекләп бөтөрөү

**ПЕРЕГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **перегла́дить**

**ПЕРЕГЛЯ́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* (бер-беренә) ҡарашыу, күҙ ташлашыу

**ПЕРЕГЛЯНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **перегля́дываться**

**ПЕРЕГНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡыуып алып барыу, ҡыуалау; **перегна́ть скот на зи́мнее па́стбище** малды тибенгә ҡыуалау **2.** *кого-что*; *прям., перен.* (*обогнать*) уҙыу, уҙып китеү (*уҙышта, ярышта һ.б.*) **3.** *что* ҡыуыу; **перегна́ть нефть** нефть ҡыуыу

**ПЕРЕГНИВА́ТЬ** *несов. см.* **перегни́ть**

**ПЕРЕГНИ́ТЬ** *сов.* сереү, сереп бөтөү

**ПЕРЕГНОИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* серетеү, серетеп бөтөрөү; **перегнои́ть мно́го се́на** күп бесәнде серетеп бөтөрөү

**ПЕРЕГНО́Й** *м* серемтә, серетмә

**ПЕРЕГНО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое серемтә ...ы; **перегно́йный слой** серемтә ҡатламы

**ПЕРЕГНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* уртаға (икегә, урталай) бөкләү (бөгөү); **перегну́ть лист бума́ги попола́м** ҡағыҙ битен уртаға бөкләү **2.** *разг.* (*согнуть чрезмерно*) үтә бөгөү, ныҡ бөгөп ташлау **3.** *без доп.*; *перен.*, *разг.* арттырып (аштырып) ебәреү; **э́то ты перегну́л** быныһын арттырып уҡ ебәрҙең ♦ **перегну́ть па́лку** арттырып ебәреү

**ПЕРЕГНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бөкләнеү, бөгөлөү; **лист бума́ги перегну́лся** ҡағыҙ бите бөкләнде **2.** (*согнуть тело*) бөгөлөү, эйелеү; **перегну́ться че́рез плете́нь** ситән аша эйелеү

**ПЕРЕГОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** һүҙ ҡушыу, һөйләшеү, һөйләшеп алыу; **перегова́риваться со знако́мым** таныш менән һөйләшеү **2.** (*вести переговоры*) һөйләшеү алып барыу, һөйләшеп ҡуйыу

**ПЕРЕГОВОРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *с кем* (*коротко поговорить*) һөйләшеп алыу, һөйләшеү; **переговори́ть по телефо́ну с бра́том** ағай менән телефондан һөйләшеп алыу **2.** *что*, *о чём* (*поговорить обо всём*) күп итеп һөйләшеү **3.** *кого*; *разг.* (*подавлять своим разговором*) башҡаға һөйләргә бирмәү, ҡысҡырып һөйләп еңеү

**ПЕРЕГОВО́РНЫЙ,** -ая, -ое һөйләшеү ...ы; **междугоро́дный перегово́рный пункт** ҡала-ара һөйләшеү пункты

**ПЕРЕГОВО́РЫ** *мн.* **1.** *офиц.* һөйләшеүҙәр, фекер алышыуҙар; **дипломати́ческие перегово́ры** дипломатик һөйләшеүҙәр; **перегово́ры на вы́сшем у́ровне** юғары даирәләрҙәге һөйләшеүҙәр **2.** (*разговор*) һөйләшеү; **перегово́ры по телефо́ну** телефондан һөйләшеү

**ПЕРЕГО́Н** *м* **1.** *см.* **перегна́ть — перегоня́ть** 1; **2.** (*участок пути*) аралыҡ

**ПЕРЕГО́НКА** *ж* **1.** *см.* **перегна́ть — перегоня́ть** 1; **2.** *спец.* ҡыуыу; **суха́я перего́нка** ҡоролай ҡыуыу; **перего́нка не́фти** нефть ҡыуыу

**ПЕРЕГО́ННЫЙ,** -ая, -ое ҡыуыу ...ы; **перего́нный аппара́т** ҡыуыу аппараты

**ПЕРЕГОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **перегна́ть**

**ПЕРЕГОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **перегороди́ть**

**ПЕРЕГОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перегороди́ться** **2.** *страд. от* **перегора́живать**

**ПЕРЕГОРА́НИЕ** *с см.* **перегора́ть**

**ПЕРЕГОРА́ТЬ** *несов. см.* **перегоре́ть**

**ПЕРЕГОРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** көйгән, янған, көйөп (янып) бөткән; **перегоре́лое ма́сло** көйгән май **2.** (*истлевший*, *прелый*) сереп (бурһып, бәҫәреп) янған (бөткән); **перегоре́лое се́но** бәҫәреп янған бесән

**ПЕРЕГОРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** яныу, янып яраҡһыҙланыу; **ла́мпочка перегоре́ла** лампочка янған **2.** янып өҙөлөү (һыныу); **ба́лка перегоре́ла** өрлөк янып һынған **3.** *разг.* (*подгореть*) ҡара көйөү (яныу); **мя́со перегоре́ло** ит ҡара янған **4.** (*сгнить*) янып сереү (бәҫәреү, бурһыу); **наво́з перегоре́л** тиреҫ янып серегән **5.** (*превратиться в золу*) янып бөтөү; **дрова́ в печи́ перегоре́ли** мейестәге утын янып бөткән **6.** *перен.* (*притупиться — о чувствах, переживаниях и т.п.*) баҫылыу, бөтөү; **боль в душе́ перегоре́ла** йөрәк әрнеүе баҫылды

**ПЕРЕГОРОДИ́ТЬ** *сов. что* бүлеү, кәртәләү, бүлеп (кәртәләп) ҡуйыу; **перегороди́ть ко́мнату** бүлмәне бүлеү

**ПЕРЕГОРОДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бүленеү, кәртәләнеү

**ПЕРЕГОРО́ДКА** *ж* **1.** бүлкә, бүлмә; **я́щик с перегоро́дками** бүлкәле йәшник **2.** *перен.* кәртә, бүлмә, кәзәнкә

**ПЕРЕГРЕ́В** *м см.* **перегре́ть — перегрева́ть, перегре́ться — перегрева́ться**

**ПЕРЕГРЕВА́НИЕ** *с см.* **перегре́ть, перегре́ться**

**ПЕРЕГРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **перегре́ть**

**ПЕРЕГРЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перегре́ться** **2.** *страд. от* **перегрева́ть**

**ПЕРЕГРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* артыҡ (үтә) йылытыу (эҫетеү, ҡыҙҙырыу); **перегре́ть молоко́** һөттө артыҡ йылытыу; **перегре́ть мото́р** моторҙы үтә ҡыҙҙырыу **2.** *что*; *тех.* үтә эҫетеп (ҡыҙҙырып) ебәреү

**ПЕРЕГРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** үтә (артыҡ) эҫеү (ҡыҙыу); **утюг перегре́лся** үтек үтә ҡыҙған **2.** (*на солнце*) яныу, эҫе ҡабыу

**ПЕРЕГРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **перегрузи́ть**

**ПЕРЕГРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перегрузи́ться** **2.** *страд. от* **перегружа́ть**

**ПЕРЕГРУ́ЖЕННОСТЬ** и **ПЕРЕГРУЖЁННОСТЬ** *ж* **1.** артыҡ (саманан тыш) тейәү; **перегру́женность маши́ны** машинаға йөктө саманан тыш тейәү **2.** (*в работе*) эштең үтә (саманан тыш) күп булыуы, артыҡ эш йөкмәтеү

**ПЕРЕГРУЗИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* күсереп тейәү; **перегрузи́ть я́щики с бе́рега на паро́м** йәшниктәрҙе ярҙан борамға тейәү **2.** *кого-что* (*нагрузить сверх меры*) артыҡ (саманан тыш) тейәү; **перегрузи́ть ло́дку** кәмәгә саманан тыш тейәү **3.** *что*; *перен.* артыҡ ҙурайтыу, тултырыу; **перегрузи́ть статью́ ци́фрами** мәҡәләне цифрҙар менән тултырыу **4.** *кого-что* (*дать чрезмерную нагрузку*) баҫып ташлау, күп йөкмәтеү, артыҡ көс төшөрөү; **перегрузи́ть дви́гатель** двигателгә артыҡ көс төшөрөү

**ПЕРЕГРУЗИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** күсереп тейәү (*бер транспорттан икенсеһенә*) **2.** (*нагрузиться чрезмерно*) күп тейәп ташлау, артыҡ йөк алыу

**ПЕРЕГРУ́ЗКА** *ж см.* **перегрузи́ть — перегружа́ть, перегрузи́ться — перегружа́ться**

**ПЕРЕГРУ́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое күсереп тейәү ...ы; **перегру́зочные рабо́ты** күсереп тейәү эштәре

**ПЕРЕГРУППИРОВА́ТЬ** *сов.* *кого-что* яңынан төркөмдәргә айырыу (бүлеү), яңынан

төркөмләү; **перегруппирова́ть войска́** ғәскәрҙе яңынан төркөмләү

**ПЕРЕГРУППИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* яңынан төркөмдәргә бүленеү

**ПЕРЕГРУППИРО́ВКА** *ж см.* **перегруппирова́ть — перегруппиро́вывать, перегруппирова́ться — перегруппиро́вываться**

**ПЕРЕГРУППИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **перегруппирова́ть**

**ПЕРЕГРУППИРО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перегруппирова́ться 2.** *страд. от* **перегруппиро́вывать**

**ПЕРЕГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **перегры́зть**

**ПЕРЕГРЫ́ЗТЬ** *сов.* **1.** *что* сәйнәп (тешләп) өҙөү; **перегры́зть ни́тку** епте тешләп өҙөү **2.** *кого-что* быуып (тамаҡлап) бөтөрөү (ташлау); **во́лки перегры́зли ове́ц** бүреләр һарыҡтарҙы тамаҡлап ташлаған **3.** *что*; *разг.* кимереп бөтөрөү, ярып (ашап) бөтөрөү; **перегры́зть все оре́хи** бөтә сәтләүекте ярып бөтөрөү

**ПЕРЕГРЫ́ЗТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*перекусать друг друга — о животных*) тешләшеү, тешләшеп (сәйнәшеп) бөтөү; **соба́ки перегры́злись** эттәр тешләшеп бөткән **2.** *перен.*, *прост.* (*переругаться*) талашып (ыҙғышып) бөтөү

**ПЕ́РЕД** и **ПЕРЕДО** *предлог с твор. п.* **1.** (*употребляется при указании предмета, места и т.п., напротив которого находится кто-что-л., происходит что-л.*) алдына, ҡаршыһына, алдында, ҡаршыһында; **останови́ться пе́ред до́мом** йорт алдына туҡтау; **стоя́ть пе́ред пе́чью** мейес ҡаршыһында тороу **2.** (*употребляется при указании на лицо, в присутствии которого, на виду у которого что-л. делается*) алдында, ҡаршыһында, алда; **пе́ред учи́телем** уҡытыусы алдында; **передо мно́й** минең алда **3.** (*употребляется при указании на лицо или явление, по отношению к которому совершается какое-л. действие, испытывается состояние*) алдында, ҡаршыһында, алды; **не отступа́ть пе́ред тру́дностями** ауырлыҡтар алдында сигенмәү; **отвеча́ть пе́ред зако́ном** закон алдында яуап биреү **4.** (*употребляется при сравнении, сопоставлении с кем-чем-л.*) алдында, алда, янында, янда; **он ничто́ пе́ред ва́ми** ул һеҙҙең алда бер кем түгел **5.** (*употребляется при указании на события, явления, действия, которым предшествует другое действие, в значении "за некоторое время до", "прежде", "раньше"*) алда, алдан, алдынан; **пе́ред обе́дом** төшкө аш алдынан; **он прие́хал пе́ред ва́ми** ул һеҙҙән алда килде

**ПЕРЁД** *м* ал, ал яҡ; **перёд пла́тья** күлдәктең алды; **перёд ша́пки** бүректең алды

**ПЕРЕДАВА́ТЬ** *несов. см.* **переда́ть**

**ПЕРЕДАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переда́ться 2.** *страд. от* **передава́ть**

**ПЕРЕДА́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое тапшырыу ...ы; **переда́точный пункт** тапшырыу пункты; **переда́точный акт** тапшырыу акты

**ПЕРЕДА́ТЧИК** *м* **1.** тапшырыусы **2.** тапшырғыс; **ла́мповый переда́тчик** лампалы тапшырғыс

**ПЕРЕДА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*вручить, отдать*) тапшырыу, (ҡулына) биреү; **переда́ть запи́ску** яҙыу тапшырыу **2.** *что* (*сообщить, рассказать*) әйтеү, еткереү, һөйләп (әйтеп) биреү; **переда́ть мысль а́втора** автор фекерен әйтеп биреү **3.** *что* (*сообщить, распространить средствами связи*) тапшырыу, биреү, белдереү, хәбәр итеү; **переда́ть конце́рт по ра́дио** радионан концерт биреү **4.** *что* (*изобразить, воспроизвести*) биреү, кәүҙәләндереү; **худо́жник переда́л красоту́ зи́мнего у́тра** рәссам ҡышҡы иртәнең матурлығын кәүҙәләндергән **5.** *что* (*поделиться знаниями, опытом и т.п.*) биреү, өйрәтеү, тәрбиәләү; **переда́ть де́тям любо́вь к труду́** балаларҙы эш һөйөргә өйрәтеү **6.** *что* йоҡтороу; **переда́ть инфе́кцию** инфекция йоҡтороу **7.** *что* (*направить в следующую инстанцию*) тапшырыу, биреү; **переда́ть де́ло в суд** эште суд ҡарамағына тапшырыу **8.** *что*, *чего* и *без доп.*; *разг.* (*дать лишнее*) артыҡ биреү

**ПЕРЕДА́ТЬСЯ** *сов.* күсеү, йоғоу; **его́ волне́ние передало́сь и мне** уның тулҡынланыуы миңә лә күсте

**ПЕРЕДА́ЧА** *ж* **1.** *см.* **переда́ть — передава́ть 2.** тапшырыу; **музыка́льная переда́ча** музыкаль тапшырыу; **програ́мма переда́ч по ра́дио** радиотапшырыуҙар программаһы **3.** тапшырма, күстәнәс; **принести́ переда́чу в больни́цу** хәстәханаға тапшырма килтереү **4.** тапшырғыс; **зубча́тая переда́ча** тешле тапшырғыс; **цепна́я переда́ча велосипе́да** велосипедтың сылбырлы тапшырғысы

**ПЕРЕДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **передви́нуть**

**ПЕРЕДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **передви́нуться 2.** йөрөү; **передвига́ться с трудо́м** көскә йөрөү **3.** *страд. от* **передвига́ть**

**ПЕРЕДВИЖЕ́НИЕ** *с см.* **передви́нуть — передвига́ть, передви́нуться — передвига́ться**

**ПЕРЕДВИ́ЖКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **передви́нуть — передвига́ть, передви́нуться — передвига́ться 2.** күсмә; **библиоте́ка-передви́жка** күсмә китапхана

**ПЕРЕДВИ́ЖНИК** *м* передвижник (*Рәсәйҙә XIX б. икенсе яртыһында күсмә художестволы күргәҙмәләр ойошмаһында торған демократик ҡараштағы реалист рәссам*)

**ПЕРЕДВИЖНО́Й,** -ая, -ое **1.** күсерелмәле, шыуҙырмалы; **передвижно́е кре́сло** шыуҙырмалы кресло **2.** күсмә, сәйер (итеүсе); **передвижна́я вы́ставка** күсмә күргәҙмә; **передвижно́й цирк** күсмә цирк

**ПЕРЕДВИ́НУТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*усилием, нажатием переместить*) күсереү, шылдырыу, күсереп (шыуҙырып) ҡуйыу; **передви́нуть часо-**

**ву́ю стре́лку** сәғәт телен күсереү; **передви́нуть войска́ к грани́це** ғәскәрҙе сик буйына күсереү **2.** *что*; *разг.* (*назначить на другое время*) күсереү; **передви́нуть сро́ки выполне́ния рабо́ты** эште үтәү ваҡытын күсереү

**ПЕРЕДВИ́НУТЬСЯ** *сов.* күсеү, күсеп ултырыу; **передви́нуться на друго́е ме́сто** икенсе урынға күсеп ултырыу

**ПЕРЕДЕ́Л** *м см.* **передели́ть** — **переделя́ть**; **переде́л земли́** ерҙе ҡабаттан бүлеү

**ПЕРЕДЕ́ЛАТЬ** *сов.* **1.** *что* (*изменить*) үҙгәртеү, үҙгәртеп алыу (эшләү); **переде́лать костю́м** костюмды үҙгәртеп тегеү; **переде́лать свой хара́ктер** үҙ холҡоңдо үҙгәртеү **2.** *что* (*сделать из одного другое*) -дан/-дән яһау (эшләү); **переде́лать рома́н в пье́су** романдан пьеса эшләү **3.** *что*; *разг.* эшләп (яһап) ташлау; **переде́лать мно́го дел** күп эш эшләп ташлау

**ПЕРЕДЕ́ЛАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* үҙеңде үҙгәртеү

**ПЕРЕДЕЛИ́ТЬ** *сов. что* яңынан (ҡабаттан) бүлеү (бүлешеү); **передели́ть земе́льный уча́сток** ер участкаһын яңынан бүлеү

**ПЕРЕДЕ́ЛКА** *ж* **1.** *см.* **переде́лать** 1, 2 — **переде́лывать**, **переде́латься** — **переде́лываться** **2.** (*то, что переделано*) үҙгәртеп эшләнгән (яһалған) нәмә ♦ **попа́сть в переде́лку** күңелһеҙ хәлгә ҡалыу; **побыва́ть в переде́лке** күпте күреү, күп яфа сигеү

**ПЕРЕДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **переде́лать**

**ПЕРЕДЕ́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переде́латься** **2.** *страд. от* **переде́лывать**

**ПЕРЕДЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **передели́ть**

**ПЕРЕДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **передёрнуть**

**ПЕРЕДЁРГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **передёрнуть**, **передёрнуться** **2.** *страд. от* **передёргивать**

**ПЕРЕДЕРЖА́ТЬ** *сов. что* **1.** артыҡ (оҙаҡ) тотоу; **передержа́ть суп на огне́** ашты утта артыҡ тотоу **2.** (*сдать ещё раз экзамен по тому же предмету*) ҡабаттан биреү; **передержа́ть годи́чный экза́мен** йыллыҡ имтиханды ҡабаттан биреү

**ПЕРЕДЕ́РЖИВАТЬ** *несов. см.* **передержа́ть**

**ПЕРЕДЕ́РЖКА** *ж см.* **передержа́ть** — **переде́рживать** 1

**ПЕРЕДЁРНУТЬ** *сов.* **1.** *что* тартып ҡуйыу; **передёрнуть во́жжи** дилбегәне тартып ҡуйыу **2.** *кого-что безл.* (*судорожно исказить — о гримасе, улыбке*) (сырай) һытылыу, сытрайыу, сирҡанып китеү; **его́ передёрнуло от отвраще́ния** ерәнеүҙән уның сырайы һытылды **3.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*переменить карту*) йәшерен алмаштырыу, аранан һурып алыу **4.** *что*; *перен.* (*исказить*) боҙоп күрһәтеү; **передёрнуть фа́кты** факттарҙы боҙоп күрһәтеү

**ПЕРЕДЁРНУТЬСЯ** *сов.* (сырай) һытылыу, сытрайыу, һелкенеп (ҡалтыранып) ҡуйыу; **передёрнуться от озно́ба** өшөүҙән ҡалтыранып ҡуйыу

**ПЕРЕ́ДНИЙ,** -яя, -ее алғы; **пере́дние зу́бы** алғы тештәр; **пере́днее колесо́** алғы тәгәрмәс; **пере́дний план карти́ны** картинаның алғы планы ♦ **пере́дний у́гол** *см.* **у́гол**

**ПЕРЕ́ДНИК** *м* алъяпҡыс; **но́вый пере́дник** яңы алъяпҡыс

**ПЕРЕ́ДНЯЯ** *ж* алғы бүлмә (яҡ)

**ПЕРЕДО** *предлог см.* **пе́ред**; **передо мно́й** минең алда (алдымда)

**ПЕРЕДОВЕ́РИТЬ** *сов. что, кому* икенсе бәрәүгә тапшырыу (*үҙеңә ҡушылған бурысты, ышанысты*)

**ПЕРЕДОВЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **передове́рить**

**ПЕРЕДОВИ́К** *м*; *разг.* алдынғы; **передовики́ произво́дства** хеҙмәт алдынғылары

**ПЕРЕДОВИ́ЦА** *ж*; *разг.* баш мәҡәлә

**ПЕРЕДОВО́Й,** -ая, -ое **1.** алдағы; **привяза́ть колоко́льчик к ше́е передово́й ло́шади** алдағы аттың муйынына ҡыңғырау тағыу **2.** *воен.* алғы; **передово́й отря́д** алғы отряд; **передова́я кре́пость** алғы нығытма **3.** *в разн. знач.* алдынғы; **передово́е предприя́тие** алдынғы предприятие; **передовы́е взгля́ды** алдынғы ҡараштар ♦ **передова́я пози́ция** алғы позиция; **передова́я статья́** баш мәҡәлә

**ПЕРЕДО́К** *м* **1.** алды, ал яғы (*арба, сананың һ.б.*); **сесть на передо́к теле́ги** арбаның ал яғына ултырыу **2.** (*двухколёсная повозка*) передок, ике тәгәрмәсле арба (*орудие йөрөтөү өсөн*) **3.** (*часть обуви*) йөҙ (*аяҡ кейемендә*)

**ПЕРЕДОХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** көрһөнөп (тын алып) ҡуйыу **2.** *разг.* (*немного отдохнуть*) хәл йыйып алыу, тын алыу, бер аҙ ял итеү

**ПЕРЕДРА́ЗНИВАТЬ** *несов. см.* **передразни́ть**

**ПЕРЕДРАЗНИ́ТЬ** *сов. кого-что* и *без доп.* үсекләү, ирештереү, үсекләп ҡотортоу

**ПЕРЕДРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һуғышып бөтөү

**ПЕРЕДРЯ́ГА** *ж*; *разг.* ауыр (ҡыйын) хәл; **попа́сть в передря́гу** ҡыйын хәлгә эләгеү

**ПЕРЕДУ́МАТЬ** *сов.* **1.** (*раздумать*) кире уйлау; **я переду́мал, не пое́ду** мин кире уйланым, бармайым **2.** *что, о чём*; *разг.* күп (ҡат-ҡат) уйлау, төрлөһөн уйлау; **все ду́мы переду́мал** төрлө уйҙар уйлап бөттөм

**ПЕРЕДУ́МЫВАТЬ** *несов. см.* **переду́мать**

**ПЕРЕДУШИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* быуыу, быуып бөтөрөү (сығыу, ташлау); **лиса́ переду́ши́ла мно́го кур** төлкө бик күп тауыҡты быуған

**ПЕРЕДЫХА́ТЬ** *несов. см.* **передохну́ть**

**ПЕРЕДЫ́ШКА** *ж* (әҙерәк) тын алыу, туҡтау, ял итеү; **без переды́шки** тын да алмай; **сде́лать переды́шку** ял итеп алыу

**ПЕРЕЕДА́ТЬ** *несов. см.* **перее́сть**

**ПЕРЕЕ́ЗД** *м* **1.** *см.* **перее́хать** — **переезжа́ть** 1, 2; **перее́зд на но́вое ме́сто** яңы урынға күсеү

**2.** (*место*) аша (арҡыры) сыға торған ер; **железнодоро́жный перее́зд** тимер юл аша сыға торған ер

**ПЕРЕЕЗЖА́ТЬ** *несов. см.* **перее́хать**

**ПЕРЕЕ́СТЬ** *сов.* **1.** *чего* и *без доп.* артыҡ ашау; **ребёнок перее́л** бала артыҡ ашаған **2.** *что* ашау, ҡырҡыу; **ржа́вчина перее́ла бо́чку** мискәне тут ашаған

**ПЕРЕЕ́ХАТЬ** *сов.* **1.** *что*, *через что* аша сығыу; **перее́хать ре́ку** йылғаны аша сығыу **2.** (*переселиться*) күсенеү, күсеү, күсенеп (күсеп) китеү (килеү); **перее́хать в но́вый дом** яңы йортҡа күсенеү **3.** *кого-что* (*раздавить*) тапатып китеү (үтеү)

**ПЕРЕЖА́РИВАТЬ** *несов. см.* **пережа́рить**

**ПЕРЕЖА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пережа́риться 2.** *страд. от* **пережа́ривать**

**ПЕРЕЖА́РИТЬ** *сов. что* **1.** (*зажарить слишком сильно*) артыҡ (үтә) ныҡ ҡурыу (ҡыҙҙырыу); **пережа́рить ры́бу** балыҡты артыҡ ныҡ ҡурыу **2.** *разг.* (*изжарить всё, многое*) ҡурып (ҡыҙҙырып) бөтөрөү; **пережа́рить все котле́ты** бөтә котлетты ҡурып бөтөрөү **3.** *разг.* (*поджарить заново*) ҡабаттан (яңынан) ҡурыу

**ПЕРЕЖА́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** артыҡ (үтә) ныҡ ҡурылыу, (ҡыҙыуҙа тороп) ҡатып китеү; **мя́со пережа́рилось** ит үтә ныҡ ҡурылған **2.** *разг.* (*перегреться*) артыҡ ныҡ ҡыҙыныу; **пережа́риться на со́лнце** ҡояшта артыҡ ныҡ ҡыҙыныу

**ПЕРЕЖДА́ТЬ** *сов. кого-что* көтөп (тороп) тороу; **пережда́ть до́ждь** ямғыр тымғанын көтөп тороу

**ПЕРЕЖЕВА́ТЬ** *сов. что* сәйнәп еткереү; **пережева́ть пи́щу** аҙыҡты сәйнәп еткереү

**ПЕРЕЖЁВЫВАНИЕ** *с см.* **пережёвывать**

**ПЕРЕЖЁВЫВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **пережева́ть 2.** *что*; *перен.* тылҡыу, ҡат-ҡат һөйләү (яҙыу); **пережёвывать изве́стные и́стины** билдәле хәҡиҡәтте ҡат-ҡат һөйләү

**ПЕРЕЖЕНИ́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* өйләндереп бөтөрөү; **пережени́ть сынове́й** улдарҙы өйләндереп бөтөрөү

**ПЕРЕЖЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* өйләнешеп бөтөү

**ПЕРЕЖЕ́ЧЬ** *сов. что* **1.** артыҡ яндырыу (көйҙөрөү); **пережéчь кирпи́ч** кирбесте артыҡ яндырыу; **пережéчь ко́фе** кофены артыҡ көйҙөрөү **2.** (нык ҡыҙҙырып) яндырып ҡуйыу; **пережéчь ла́мпочку** лампочканы яндырып ҡуйыу **3.** *разг.* (*израсходовать сверх нормы*) артыҡ яндырыу **4.** (*кислотой, огнём и т.п. разделить надвое*) яндырып (үртәп, ҡыҙҙырып, ашатып) өҙөү; **пережéчь про́волоку кислото́й** тимерсыбыҡты кислотанан ашатып өҙөү **5.** (*сжечь всё, многое*) яндырып бөтөрөү; **пережéчь все дрова́** бар булған утынды яндырып (яғып) бөтөрөү **6.** *спец.* (*переработать*) үртәү, яндырыу; **пережéчь дрова́ на у́голь** ағасты күмергә яндырыу; **пережéчь и́звесть** эзбиз яндырыу

**ПЕРЕЖИВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **пережива́ть 2.** *обычно мн.* **пережива́ния** кисерештәр; **тяжёлые пережива́ния** ауыр кисерештәр

**ПЕРЕЖИВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **пережи́ть 2.** *за кого-что* и *без доп.*; *разг.* (*беспокоиться*) ҡайғырыу, борсолоу, өҙгөләнеү; **зря не пережива́ть** юҡҡа борсолмау

**ПЕРЕЖИГА́ТЬ** *несов. см.* **пережéчь**

**ПЕРЕЖИДА́ТЬ** *несов. см.* **пережда́ть**

**ПЕРЕЖИТО́Е** *с* баштан кисергәндәр (үткәндәр), күргәндәр

**ПЕРЕЖИ́ТОК** *м* ҡалдыҡ; **пережи́ток ста́рого** иҫке тормош ҡалдығы

**ПЕРЕЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* оҙағыраҡ (артығыраҡ, ҡалып) йәшәү **2.** *что* и *без доп.* (*выжить*) үлмәй тороп ҡалыу, үткәреп ебәреү; **пережи́ть моро́зы** һыуыҡтарҙы үткәреп ебәреү **3.** *что* (*найти в себе силы вытерпеть что-л.*) түҙеү, сыҙау, күтәрә алыу; **пережи́ть го́ре** ҡайғыға түҙеү **4.** *что* (*испытать что-л.*) кисереү, баштан үткәреү, татыу; **пережи́ть большу́ю ра́дость** ҙур шатлыҡ кисереү; **пережи́ть кри́зис** кризис кисереү

**ПЕРЕЖО́Г** *м*; *разг.* **1.** *см.* **пережéчь** — **пережига́ть** 1, 2, 3, 6; **2.** (*перерасход*) артыҡ (күп) яндырыу; **пережо́г то́плива** яғыулыҡты артыҡ яндырыу

**ПЕРЕЗАБЫ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* онотоп бөтөрөү; **перезабы́ть вы́ученные стихи́** ятлаған шиғырҙарҙы онотоп бөтөү

**ПЕРЕЗАКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **перезаложи́ть**

**ПЕРЕЗАКЛЮЧА́ТЬ** *несов. см.* **перезаключи́ть**

**ПЕРЕЗАКЛЮЧИ́ТЬ** *сов. что* яңынан (ҡайтанан, ҡабаттан) төҙөү (*килешеүҙе һ.б.*)

**ПЕРЕЗАЛОЖИ́ТЬ** *сов. что* яңынан (ҡабаттан, ҡайтанан) закладка һалыу

**ПЕРЕЗАРЯДИ́ТЬ** *сов. что* яңынан (ҡабаттан, ҡайтанан) ҡороу; **перезаряди́ть ружьё** мылтыҡты ҡайтанан ҡороу

**ПЕРЕЗАРЯЖА́ТЬ** *несов. см.* **перезаряди́ть**

**ПЕРЕЗВА́НИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **перезвони́ть 2.** (*в колокола*) ҡыңғырауҙарҙы алмаштилмәш ҡағыу **3.** (*звенеть чем-л.*) сыңлатыу, шылтыратыу

**ПЕРЕЗВО́Н** *м* **1.** *см.* **перезва́нивать** 2, 3; **2.** сың тауыштары, ҡыңғырауҙар сыңлау

**ПЕРЕЗВОНИ́ТЬ** *сов.* **1.** яңынан (ҡайтанан, ҡабаттан) шылтыратыу **2.** *разг.* (*позвонить всем, многим*) шылтыратып сығыу; **перезвони́ть всем друзья́м** бөтә дуҫтарға шылтыратып сығыу

**ПЕРЕЗИМОВА́ТЬ** *сов.* **1.** ҡышлау, ҡышты үткәреү; **перезимова́ть в дере́вне** ҡышты ауылда үткәреү **2.** (*о животных, растениях*) ҡыш сығыу, ҡышлау

**ПЕРЕЗНАКО́МИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* таныштырып сығыу; **перезнако́мить госте́й** ҡунаҡтарҙы таныштырып сығыу

**ПЕРЕЗНАКО́МИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* танышып сығыу; **перезнако́миться со все́ми** бөтәһе менән танышып сығыу

**ПЕРЕЗРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **перезре́ть**

**ПЕРЕЗРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** артыҡ (үтә) ныҡ бешкән; **перезре́лый плод** артыҡ ныҡ бешкән емеш **2.** *перен.*, *разг.* йәше сыҡҡан, һаҙаған; **перезре́лая деви́ца** һаҙаған ҡыҙ

**ПЕРЕЗРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** артыҡ (үтә) ныҡ бешеү; **я́годы перезре́ли** еләктәр үтә ныҡ бешкән **2.** *перен., разг.* (*обычно о девушке*) йәше сығыу, һаҙаған булыу

**ПЕРЕЗЯ́БНУТЬ** *сов.*; *разг.* өшөп (туңып) бөтөү

**ПЕРЕИГРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*сыграть повторно*) яңынан (ҡабат) уйнау; **переигра́ть па́ртию в ша́хматы** шахмат партияһын яңынан уйнау **2.** *что*; *перен.*, *разг.* (*решить заново*) яңынан (башҡаса) хәл итеү; **э́то де́ло ну́жно переигра́ть** был эште яңынан хәл итеү кәрәк **3.** *что* (*сыграть всё, многое*) уйнап сығыу (бөтөү); **переигра́ть все пье́сы** бөтә пьесаларҙы уйнап сығыу **4.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*сыграть роль ненатурально*) арттырып (шаштырып) ебәреү (*роль башҡарғанда*), яһалма уйнау; **актёр переигра́л** актёр арттырып ебәрҙе

**ПЕРЕЙ́ГРЫВАНИЕ** *с см.* **перей́грывать**

**ПЕРЕЙ́ГРЫВАТЬ** *несов. см.* **переигра́ть**

**ПЕРЕИЗБИРА́ТЬ** *несов. см.* **переизбра́ть**

**ПЕРЕИЗБРА́НИЕ** *с см.* **переизбра́ть**

**ПЕРЕИЗБРА́ТЬ** *сов. кого-что* яңынан (ҡабат) һайлау; **переизбра́ть наро́дного депута́та** халыҡ депутатын яңынан һайлау

**ПЕРЕИЗДАВА́ТЬ** *несов. см.* **переизда́ть**

**ПЕРЕИЗДА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **переизда́ть 2.** (*книга*) китаптың сираттағы (яңы) баҫмаһы, яңынан баҫтырып сығарылған китап

**ПЕРЕИЗДА́ТЬ** *сов. что* ҡайтанан (ҡабаттан, яңынан) баҫтырып сығарыу

**ПЕРЕИМЕНОВА́НИЕ** *с см.* **переименова́ть**

**ПЕРЕИМЕНОВА́ТЬ** *сов. кого-что* исемен (атамаһын) алмаштырыу, яңы исем (атама) биреү; **переименова́ть го́род** ҡаланың исемен алмаштырыу

**ПЕРЕИМЕНО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **переименова́ть**

**ПЕРЕЙ́МЧИВОСТЬ** *ж*; *разг.* отҡорлоҡ, отоп алыусанлыҡ, сослоҡ

**ПЕРЕЙ́МЧИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* отҡор, отоп алыусан, сос; **перей́мчивый ребёнок** отҡор бала

**ПЕРЕИНА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **переина́чить**

**ПЕРЕИНА́ЧИТЬ** *сов. что*; *разг.* үҙгәртеү, икенсе төрлө (башҡаса) итеү; **переина́чить расска́з** хикәйәне үҙгәртеү

**ПЕРЕЙТИ́** *сов.* **1.** *что*, *через что* үтеү, аша сығыу; **перейти́ грани́цу** сик аша сығыу; **перейти́ у́лицу** урам аша сығыу **2.** *в разн. знач.* күсеү; **перейти́ на другу́ю рабо́ту** икенсе эшкә күсеү; **перейти́ на но́вую кварти́ру** яңы фатирға күсеү; **перейти́ от слов к де́лу** һүҙҙән эшкә күсеү; **перейти́ в наступле́ние** һөжүмгә күсеү **3.** *во что* әүерелеү, әйләнеү; **дождь перешёл в снег** ҡар ямғырға әйләнде; **дру́жба перешла́ в любо́вь** дуҫлыҡ мөхәббәткә әйләнде; **коли́чество перешло́ в ка́чество** һан сифатҡа әйләнде **4.** (*примкнуть к кому-л.*) сығыу; **перейти́ на сто́рону восста́вших** баш күтәреүселәр яғына сығыу **5.** *что*, *за что*; *разг.* (*переступить*) ашыу, уҙыу, үтеү, сығыу; **перейти́ ме́ру** саманан ашыу; **перейти́ грани́цы прили́чия** әҙәплелек сиктәренән сығыу

**ПЕРЕКА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **перекали́ть**

**ПЕРЕКА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перекали́ться 2.** *страд. от* **перека́ливать**

**ПЕРЕКАЛИ́ТЬ** *сов. что* артыҡ (ныҡ, артыҡ ныҡ, үтә, үтә ныҡ) ҡыҙҙырыу; **перекали́ть сталь** ҡоросто үтә ныҡ ҡыҙҙырыу; **перекали́ть печь** мейесте ныҡ ҡыҙҙырыу

**ПЕРЕКАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* үтә (артыҡ ныҡ, артыҡ, үтә ныҡ) ҡыҙыу, бигерәк ҡыҙып китеү; **сталь перекали́лась** ҡорос үтә ҡыҙған

**ПЕРЕКА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **переколо́ть** I

**ПЕРЕКА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **перекопа́ть**

**ПЕРЕКА́РМЛИВАТЬ** *несов. см.* **перекорми́ть**

**ПЕРЕКА́Т** *м* **1.** *см.* **перекати́ть — перека́тывать 2.** *обычно мн.* **перека́ты** гөрһөлдәү, гөрөлдәк; **перека́ты канона́ды** канонада гөрһөлдәүе **3.** (*на реке*) шаршы; **лови́ть ры́бу на перека́те** шаршыла балыҡ тотоу

**ПЕРЕКАТА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** тәгәр(л)әтеп күсереп йөрөтөү, тәгәр(л)әтеп күсереү (төшөрөү, бөтөрөү); **переката́ть все бо́чки в подва́л** бөтә мискәләрҙе баҙға тәгәр(л)әтеп күсереү **2.** ултыртып йөрөтөү (*күмәкләп*); **переката́ть ребя́т на маши́не** балаларҙы машинаға ултыртып йөрөтөү

**ПЕРЕКАТИ́-ПО́ЛЕ** *с* **1.** ҡамғаҡ **2.** *разг.*, *неодобр.* осҡалаҡ (*гел генә күсенеп йөрөгән кешегә ҡарата*)

**ПЕРЕКАТИ́ТЬ** *сов. кого-что* тәгәр(л)әтеп күсереү; **перекати́ть бо́чку** мискә тәгәр(л)әтеү

**ПЕРЕКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* тәгәр(л)әп үтеү (уҙып китеү), тәгәрәп сығыу; **мяч перекати́лся за черту́** туп һыҙыҡты тәгәрәп үтеп китте

**ПЕРЕКА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **перекати́ть**

**ПЕРЕКА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перекати́ться 2.** *страд. от* **перека́тывать**

**ПЕРЕКАЧА́ТЬ** *сов. что* һурҙырып ағыҙыу, икенсе яҡҡа ҡыуыу; **перекача́ть во́ду насо́сами** һыуҙы насостар менән һурҙырып ағыҙыу

**ПЕРЕКА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **перекача́ть**

**ПЕРЕКА́ЧКА** *ж см.* **перекача́ть — перека́чивать**

**ПЕРЕКА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **перекоси́ть** II

**ПЕРЕКА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перекоси́ться 2.** *страд. от* **перека́шивать**

**ПЕРЕКВАЛИФИКА́ЦИЯ** *ж см.* **переквалифици́роваться**

**ПЕРЕКВАЛИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого* квалификация үҙгәртеү, яңы квалификация биреү

**ПЕРЕКВАЛИФИЦИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* яңы квалификация алыу, яңы һөнәргә өйрәнеү **2.** *несов. страд. от* **переквалифици́ровать**

**ПЕРЕКИДА́ТЬ** *сов. что* ырғытыу, ырғытып бөтөрөү

**ПЕРЕКИДНО́Й,** -ая, -ое **1.** арҡыры (аша) һалынмалы, ҡайтармалы; **перекидно́й мост** аша һалынмалы күпер; **перекидно́й календа́рь** ҡайтармалы календарь **2.** (*перемётный*) аша һалмалы, аҫмалы; **перекидна́я су́мка** аҫмалы сумка

**ПЕРЕКИ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **переки́нуть**

**ПЕРЕКИ́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переки́нуться 2.** *страд. от* **переки́дывать**

**ПЕРЕКИ́НУТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (аша) ташлау, (аша) ырғытыу; **переки́нуть мяч че́рез забо́р** тупты ҡойма аша ырғытыу **2.** *что* (аша) һалыу (ҡуйыу); **переки́нуть полоте́нце че́рез плечо́** таҫтамалды иңбашҡа (яурынға) һалыу **3.** *что* (*устроить для переправы*, *перехода*) (аша) һалыу; **переки́нуть мост че́рез ров** соҡор аша күпер һалыу **4.** *кого-что*; *разг.* (*перевести*) күсереү; **переки́нуть люде́й с заво́да на строи́тельство** кешеләрҙе заводтан төҙөлөшкә күсереү **5.** *что* и *без доп.* (*кинуть дальше*, *чем следует*) яҙа (уҙҙыра) ташлау; **переки́нуть мяч за черту́** тупты һыҙыктан яҙа ташлау

**ПЕРЕКИ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** (*быстро переместиться через что-л.*) (аша) төшөү (һикереү), (аша) һикереп сығыу (төшөү); **переки́нуться че́рез забо́р** ҡойма аша һикереү **2.** (*переброситься*) күсеү; **ого́нь переки́нулся на сосе́днюю стро́йку** ут күрше төҙөлөшкә күсте **3.** (*быть проложенным для переправы*) аша һалыныу **4.** (*быстро переместиться на другое место*, *сменить занятие и т.д.*) күсә (китә) һалыу, китә һалып барыу, ҡасыу **5.** *чем* ырғытышыу, атышыу (*бер-береңә*) **6.** *чем*; *перен.* (*быстро обменяться словами*, *взглядами*) әйтешеп (һөйләшеп) алыу, ҡараш ташлашыу

**ПЕРЕКИСА́ТЬ** *несов. см.* **переки́снуть**

**ПЕРЕКИ́СНУТЬ** *сов.* ҡурыйыу, ныҡ (үтә) әсеү; **смета́на переки́сла** ҡаймаҡ ныҡ әсегән

**ПЕ́РЕКИСЬ** *ж*; *хим.* перекись, ҡырҡыу әсемә; **пе́рекись водоро́да** водород перекисы

**ПЕРЕКЛА́ДИНА** *ж* **1.** арҡыры таяҡ, һайғау, өрлөк, тата; **дверна́я перекла́дина** ишек татаһы **2.** *см.* **турни́к**

**ПЕРЕКЛА́ДКА** *ж*; *разг. см.* **перекла́дывать** 3, 4

**ПЕРЕКЛАДНО́Й,** -ая, -ое **1.** почта станцияларында алмаштырыла торған (*экипажға*, *аттарға ҡарата*) **2.** *в знач. сущ.* **перекладна́я** *ж*, **перекладны́е** *мн.* алмаштырылған ат(тар); **е́хать на перекладны́х** алмаштырылған аттарҙа барыу

**ПЕРЕКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **переложи́ть**

**ПЕРЕКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **перекле́ить**

**ПЕРЕКЛЕ́ИТЬ** *сов. что* (яңынан, ҡайтанан) йәбештереү; **перекле́ить ма́рки в но́вый альбо́м** маркаларҙы яңы альбомға йәбештереү; **перекле́ить обо́и** обойҙарҙы яңынан йәбештереү

**ПЕРЕКЛЕ́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **перекле́ить** — **перекле́ивать 2.** *спец.* фанеранан йәбештереп эшләнгән таҡта

**ПЕРЕКЛЕЙМИ́ТЬ** *сов. что* **1.** яңынан (ҡайтанан) келәймәләү (тамғалау) **2.** (*поставить клеймо на всё*, *многое*) тамғалап (келәймәләп) сығыу; **переклейми́ть дета́ли** деталдәрҙе тамғалап сығыу

**ПЕРЕКЛЕПА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*заклепать заново или иначе*) ҡайтанан (яңынан) сигәләү; **переклепа́ть болт** болтты яңынан сигәләү **2.** (*заклепать всё*, *многое*) сигәләп сығыу (бөтөрөү); **переклепа́ть болты́** болттарҙы сигәләп бөтөрөү

**ПЕРЕКЛИКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *с кем* тауыш бирешеү, һөрәнләшеү; **переклика́ться в лесу́** урманда тауыш бирешеү **2.** *с кем-чем*; *перен.* (*быть сходным в чём-л.*) оҡшаш (ауаздаш) булыу, яҡын тороу

**ПЕРЕКЛИ́ЧКА** *ж* **1.** *см.* **переклика́ться** 1; **2.** (*проверка*) барлау; **вече́рняя перекли́чка** кискe барлау; **опозда́ть на перекли́чку** барлауға һуңлау

**ПЕРЕКЛЮЧА́ТЕЛЬ** *м* күсергес, күсереп ялғағыс; **электри́ческий переключа́тель** электрҙы күсереп ялғағыс; **переключа́тель скорсте́й** тиҙлектәрҙе күсергес

**ПЕРЕКЛЮЧА́ТЬ** *несов. см.* **переключи́ть**

**ПЕРЕКЛЮЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переключи́ться 2.** *страд. от* **переключа́ть**

**ПЕРЕКЛЮЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* йүнәлешен үҙгәртеү, бороп ебәреү, йүнәлтеү (*икенсе ыңғайға*); **переключи́ть телеви́зор на тре́тью програ́мму** телевизорҙы өсөнсө программаға бороп ебәреү **2.** *кого-что* күсереү; **переключи́ть заво́д на произво́дство тра́кторов** заводты тракторҙар эшләүгә күсереү **3.** *что* (*направить мысли*, *разговор и т.п. на что-л. другое*) күсереү, бороп ебәреү; **переключи́ть внима́ние** иғтибарҙы күсереү

**ПЕРЕКЛЮЧИ́ТЬСЯ** *сов.* күсеү; **заво́д переключи́лся на произво́дство радиоаппарату́ры** завод радиоаппаратура эшләп сығарыуға күсте; **разгово́р переключи́лся на другу́ю те́му** һүҙ башҡа темаға күсте

**ПЕРЕКОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* яңынан (ҡабаттан, ҡайтанан) дағалау **2.** *кого-что* (*подковать всех*, *многих*) дағалап сығыу (бөтөү) **3.** *что* (*переделать ковкой*) (яңынан) сүкеп яһау; **перекова́ть мечи́ на ора́ла** ҡылыстарҙан сүкеп һабан яһау **4.** *кого-что*; *перен.* тамырынан үҙгәртеү, тәрбиәләп үҙгәртеү

**ПЕРЕКОВЕ́РКАТЬ** *сов. что*; *разг.* ныҡ боҙоу, боҙоп бөтөрөү (ташлау)



2 зак. 2.0007.06

**ПЕРЕКО́ВКА** *ж см.* **перекова́ть — переко́вывать**

**ПЕРЕКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **перекова́ть**

**ПЕРЕКОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **переколоти́ть**

**ПЕРЕКОЛОТИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** яңынан (ҡабаттан, икенсе урынға) ҡағыу; **переколоти́ть до́ску** таҡтаны икенсе урынға ҡағыу **2.** *разг.* (*разбить всё, многое*) ватып (ҡырып) бөтөрөү

**ПЕРЕКОЛО́ТЬ I** *сов.* **1.** *что* күсереп (башҡаса) ҡаҙау; **переколо́ть брошь** брошканы күсереп ҡаҙау **2.** *что* (*исколоть*) сәнскеләп (ҡаҙап) бөтөү; **переколо́ть па́льцы иго́лкой** бармаҡтарҙы энә менән сәнскеләп бөтөү **3.** *кого-что* (*убить*) үлтереү, күп тапҡыр сәнсеп үлтереү

**ПЕРЕКОЛО́ТЬ II** *сов. что* ярып (ваҡлап) бөтөрөү; **переколо́ть все дрова́** барлыҡ утынды ярып бөтөрөү

**ПЕРЕКОНСТРУИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* яңынан (ҡайтанан) төҙөү, үҙгәртеп төҙөү, конструкцияһын үҙгәртеү; **переконструи́ровать маши́ну** машинаны үҙгәртеп төҙөү

**ПЕРЕКОПА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*вскопать целиком*) ҡаҙып сығыу (бөтөрөү); **перекопа́ть все гря́дки** бөтә түтәлдәрҙе ҡаҙып сығыу **2.** (*вскопать заново*) яңынан (ҡайтанан) ҡаҙып сығыу **3.** (*выкопать ров, канаву поперёк чего-л.*) арҡыры ҡаҙып сығыу; **перекопа́ть доро́гу** юлды арҡыры ҡаҙып сығыу

**ПЕРЕКОПТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*прокоптить заново*) яңынан (ҡайтанан, киренән) ыҫлау **2.** (*прокоптить слишком сильно*) артыҡ ыҫлау, ныҡ ыҫлап ебәреү **3.** (*прокоптить всё, многое*) ыҫлап бөтөрөү (бөтөү, сығыу); **перекопти́ть ры́бу** балыҡты ыҫлап бөтөрөү

**ПЕРЕКОРМИ́ТЬ** *сов. кого* артыҡ (күберәк) ашатыу; **перекорми́ть ребёнка** баланы артыҡ ашатыу

**ПЕРЕКО́С** *м* салышлыҡ, салыш урын

**ПЕРЕКОСИ́ТЬ I** *сов. что* сабып сығыу (бөтөрөү); **перекоси́ть луг** болондо сабып сығыу

**ПЕРЕКОСИ́ТЬ II** *сов.* **1.** *что* салшайтыу; **перекоси́ть лицо́** йөҙҙө салшайтыу **2.** *что* (*расположить косо*) ауыштырыу; **перекоси́ть кни́жную по́лку** китап кәштәһен ауыштырыу **3.** *кого-что обычно безл.* сытрайыу, сырай һытыу; **его́ перекоси́ло от бо́ли** ауыртыуҙан уның сырайы һытылды

**ПЕРЕКОСИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** салшайыу, ауышыу, ҡыйшайыу; **дверь перекоси́лась** ишек ауышҡан **2.** (*о чертах лица*) сырай һытылыу, ҡаш(ы) (ҡабаҡ) емерелеү, төҫ(ө) боҙолоу

**ПЕРЕКОЧЕВА́ТЬ** *сов.* **1.** күсеү, күсеп китеү; **перекочева́ть на но́вые па́стбища** яңы көтөүлектәргә күсеп китеү **2.** *разг.* күсенеү, күсеү; **перекочева́ть на но́вую кварти́ру** яңы фатирға күсенеү

**ПЕРЕКОЧЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **перекочева́ть**

**ПЕРЕКО́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **перекоси́ть** II; **2.** *прил.* ауыш; **переко́шенная изба́** ауыш өй **3.** *прил.* (*о чертах лица*) салыш; **переко́шенный рот** салыш ауыҙ

**ПЕРЕКРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **перекрои́ть**

**ПЕРЕКРА́СИТЬ** *сов. что* **1.** (*покрасить заново*) яңынан (ҡабаттан, ҡайтанан) буяу, башҡа төҫкә буяу **2.** (*покрасить всё, многое*) буяп сығыу (бөтөрөү); **перекра́сить все о́кна** бөтә тәҙрәләрҙе буяп сығыу

**ПЕРЕКРА́СИТЬСЯ** *сов.* **1.** төҫө алмашыныу (үҙгәреү) **2.** *разг.* сәсте икенсе төҫкә буяу

**ПЕРЕКРАХМА́ЛИТЬ** *сов. что* **1.** (*накрахмалить больше, чем нужно*) артыҡ (үтә) крахмаллау; **перекрахма́лить руба́шку** күлдәкте артыҡ крахмаллау **2.** (*накрахмалить заново*) яңынан (ҡабаттан) крахмаллау **3.** (*накрахмалить всё, многое*) крахмаллап бөтөү (сығыу); **перекрахма́лить бельё** керҙе крахмаллап бөтөү

**ПЕРЕКРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **перекра́сить**

**ПЕРЕКРА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перекра́ситься 2.** *страд. от* **перекра́шивать**

**ПЕРЕКРЕСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* суҡындырыу, суҡындырып алыу **2.** *кого*; *разг.* (*при переходе в другую веру*) яңынан (ҡабаттан) суҡындырыу, башҡа диңгә күсереү **3.** *кого-что*; *разг.* (*дать новое имя, название*) яңы исем ҡушыу, исемен алмаштырыу

**ПЕРЕКРЕСТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** суҡыныу, суҡынып алыу **2.** *разг.* яңынан (ҡабаттан) суҡыныу, башҡа диңгә күсеү **3.** (*скрещиваться, пересекаться*) киҫешеү, киҫешеп үтеү

**ПЕРЕКРЁСТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** киҫешкән, сатраш; **перекрёстная у́лица** киҫешкән урам **2.** *с.-х.* арҡыры-буй; **перекрёстный спо́соб посе́ва** арҡыры-буй сәсеү ысулы **3.** (*о выстрелах*) ян-яҡтан; **перекрёстный ого́нь** ян-яҡтан утҡа тотоу ♦ **перекрёстный допро́с** *юр.* төрлө яҡлап һорау алыу (*берәүҙән бер нисә кешенең һорау алыуы*); **перекрёстное опыле́ние** *бот.* ситтән һеркәләнеү; **перекрёстная ри́фма** *лит.* аралаш рифма (*беренсе юл менән өсөнсөһөнөң, икенсе менән дүртенсеһенең рифмалашыуы*)

**ПЕРЕКРЁСТОК** *м* сат, юл (урам) саты, сатлыҡ; **шу́мный перекрёсток** шаулы урам саты

**ПЕРЕКРЕ́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **перекрести́ть** 2, 3

**ПЕРЕКРИ́КИВАТЬ** *несов. см.* **перекрича́ть**

**ПЕРЕКРИЧА́ТЬ** *сов. кого-что* ныҒыраҡ ҡысҡырыу

**ПЕРЕКРОИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*скроить заново*) яңынан (ҡабаттан, ҡайтанан) бесеү, үҙгәртеп бесеү; **перекрои́ть костю́м** костюмды яңынан бесеү **2.** *разг.* (*раскроить всё, многое*) бесеп бөтөрөү **3.** *перен.*, *разг.* тамырынан үҙгәртеү

**ПЕРЕКРУТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*вращая, испортить*) артыҡ (үтә ныҡ, үткәрә) бороу; **перекрути́ть заво́д у часо́в** сәғәттең борғосон үткәрә бороу; **перекрути́ть кран** кранды үтә ныҡ бороу **2.** (*свить плотно и туго*) ҡаты (ныҡ) сиратыу, ҡаты ишеү; **перекрути́ть верёвку** бауҙы ныҡ ишеү **3.** (*скрутить с чем-л.*) ҡушып сиратыу; **перекрути́ть шерстяну́ю ни́тку с шёлковой** йөн епте ебәк еп менән ҡушып сиратыу

**ПЕРЕКРУТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡаты боролоуҙан боҙолоу, артыҡ боролоп боҙолоу; **пружи́на у часо́в перекрути́лась** ҡаты боролоуҙан сәғәттең пружинаһы боҙолған **2.** (*повернуться, перевернуться вокруг своей оси*) әйләнеү, өйрөлөү

**ПЕРЕКРУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **перекрути́ть**

**ПЕРЕКРУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перекрути́ться 2.** *страд. от* **перекру́чивать**

**ПЕРЕКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **перекры́ть**

**ПЕРЕКРЫ́ТИЕ** *с* **1.** *см.* **перекры́ть 2.** (*опора крыши, поперечное покрытие в здании*) (түшәм, ҡыйыҡ һ.б.) таяуҙары; **черда́чное перекры́тие** сарлаҡ таяуҙары

**ПЕРЕКРЫ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*покрыть заново*) яңынан (ҡабаттан) ябыу **2.** (*сделать покрытие в строении*) ҡоролманың түбәһен ябыу **3.** *разг., карт.* баҫыу, ябыу; **перекры́ть деся́тку вале́том** унлыҡты валет менән ябыу **4.** (*превысить*) арттырып (уҙҙырып) ебәреү; **перекры́ть план** планды арттырып ебәреү **5.** (*закрыть, остановить*) бикләү, ябыу, быуыу; **перекры́ть ру́сло реки́** йылға үҙәнен быуыу; **перекры́ть газ** газды ябыу

**ПЕРЕКУВЫ́РКИВАТЬ** *несов. см.* **перекувырну́ть**

**ПЕРЕКУВЫ́РКИВАТЬСЯ** *несов. см.* **перекувырну́ться**

**ПЕРЕКУВЫРНУ́ТЬ** *сов. кого-что; разг.* мәтәлләтеү, тәкмәстереү, баш аша әйләндереү, йөҙ түбән ҡапландырыу

**ПЕРЕКУВЫРНУ́ТЬСЯ** *сов.; разг.* мәтәлләү, тәкмәсеү, баш аша әйләнеү, йөҙ түбән ҡапланыу

**ПЕРЕКУПА́ТЬ I** *несов. см.* **перекупи́ть**

**ПЕРЕКУПА́ТЬ II** *сов. кого; разг.* **1.** оҙаҡ йыуындырып ауырытыу; **перекупа́ть ребёнка** баланы оҙаҡ йыуындырып ауырытыу **2.** (*выкупать всех, многих*) йыуындырып сығыу

**ПЕРЕКУПА́ТЬСЯ** *сов.; разг.* (артыҡ, ныҡ) оҙаҡ һыу инеү (ҡойоноу); **он перекупа́лся и простуди́лся** ул, оҙаҡ һыу инеп, һалҡын тейҙергән

**ПЕРЕКУПИ́ТЬ** *сов. кого-что; разг.* **1.** (*перебить кому-л. покупку*) араға төшөп (кешенән алда) һатып алыу **2.** (*вновь купить проданное ранее кому-л.*) һатылғанды яңынан һатып алыу **3.** (*купить всё, многое*) һатып алып бөтөү

**ПЕРЕКУ́ПЩИК** *м* и **ПЕРЕКУ́ПЩИЦА** *ж* алыпһатар

**ПЕРЕКУ́Р** *м; разг.* тәмәке тартып алыу, (эштәге) ҡыҫҡа тәнәфес, ял итеп алыу

**ПЕРЕКУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **перекури́ть**

**ПЕРЕКУРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*выкурить слишком много*) артыҡ күп (саманан тыш) тартыу; **перекури́л, тепе́рь голова́ боли́т** саманан тыш тартҡанмын, хәҙер баш ауырта **2.** *кого; разг.* (*превзойти по количеству выкуренного*) артыҡ (күп) тартыу; **перекури́ть всех** бөтәһенән артыҡ тартыу **3.** *что, чего* (*куря, испробовать*) тартып ҡарау; **перекури́ть ра́зных папиро́с** күп төрлө папиросты тартып ҡарау

**ПЕРЕКУСА́ТЬ** *сов. кого-что* тешләү, тешләп бөтөү (сығыу); **э́та соба́ка перекуса́ла мно́гих** был эт күптәрҙе тешләгән

**ПЕРЕКУСА́ТЬСЯ** *сов.* тешләшеү, тешләшеп бөтөү; **соба́ки перекуса́лись** эттәр тешләшеп бөттө

**ПЕРЕКУСИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тешләп өҙөү; **перекуси́ть ни́тку** епте тешләп өҙөү **2.** *что* (*прокусить насквозь*) үтә тешләү **3.** *чего* и *без доп.; разг.* (*поесть немного*) ҡапҡылап (тамаҡ ялғап) алыу, ашап алыу

**ПЕРЕКУ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **перекуси́ть**

**ПЕРЕЛА́МЫВАТЬ** *несов. см.* **переломи́ть**

**ПЕРЕЛА́МЫВАТСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переломи́ться 2.** *страд. от* **перела́мывать**

**ПЕРЕЛЕЖА́ТЬ** *сов.; разг.* **1.** оҙаҡ ятыу; **перележа́ть на со́лнце** ҡояшта оҙаҡ ятыу **2.** (*испортиться от долгого хранения*) оҙаҡ ятыу, оҙаҡ ятып боҙолоу **3.** *кого* (*пролежать дольше кого-л.*) күберәк (артығыраҡ) ятыу

**ПЕРЕЛЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **переле́зть**

**ПЕРЕЛЕ́ЗТЬ** *сов. что, через что* аша сығыу (төшөү); **переле́зть че́рез плете́нь** ситән аша төшөү

**ПЕРЕЛЕ́СОК** *м* ваҡ урман, һирәк ағаслыҡ

**ПЕРЕЛЁТ** *м* **1.** *см.* **перелете́ть — перелета́ть; перелёт че́рез го́ры** тауҙар аша осоу **2.** (*сезонное переселение птиц*) осоп китеү; **перелёт птиц** ҡоштарҙың осоп китеүе **3.** (*падение пули, снаряда дальше цели*) арыраҡ барып төшөү

**ПЕРЕЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **перелете́ть**

**ПЕРЕЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, через что* (*летя, преодолеть какое-л. пространство*) (аша) осоп үтеү (сығыу, барыу); **перелете́ть мо́ре** диңгеҙҙе осоп сығыу; **перелете́ть че́рез А́льпы** Альп аша осоп үтеү **2.** (*летя, переместиться куда-л.*) (осоп) барып төшөү; (*о птицах*) (осоп) күсеп барыу (килеү, китеү); **пти́цы перелете́ли с се́вера на юг** ҡоштар төньяҡтан көньяҡҡа осоп күсеп китте **3.** (*упасть слишком далеко*) арыраҡ барып төшөү; **снаря́д перелете́л** снаряд арыраҡ барып төштө

**ПЕРЕЛЁТНЫЙ,** -ая, -ое күсмә, күсәр; **перелётные пти́цы** күсмә ҡоштар

**ПЕРЕЛЕ́ЧЬ** *сов.* күсеп ятыу, әйләнеп ятыу; **переле́чь на дива́н** диванға күсеп ятыу; **переле́чь с одного́ бо́ка на друго́й** бер ҡабырғанан икенсеһенә әйләнеп ятыу

**ПЕРЕЛИ́В** *м* **1.** *см.* **перели́ть** — **перелива́ть**, **перели́ться** — **перелива́ться** **2.** (*о цвете*) төрлө төҫкә (төрлөсәгә) инеп емелдәү; (*о звуке*) төрлөсәгә күсеп яңғырау

**ПЕРЕЛИВА́НИЕ** *с см.* **перелива́ть**, **перелива́ться**; **перелива́ние кро́ви больно́му** ауырыуға ҡан ебәреү; **перелива́ние кра́сок** буяуҙарҙың төрлө төҫкә инеүе

**ПЕРЕЛИВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **перели́ть** **2.** *см.* **перелива́ться** 2, 3; **перелива́ть все́ми цвета́ми ра́дуги** йәйғор төҫтәренә инеп емелдәү, йәйғор төҫтәре менән емелдәү ♦ **перелива́ть из пусто́го в поро́жнее** юҡты бушҡа ауҙарыу

**ПЕРЕЛИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перели́ться** **2.** (*о красках*) төрлө төҫкә инеп емелдәү **3.** (*о звуках*) төрлө тауышҡа күсеп яңғырау **4.** *страд. от* **перелива́ть** 1

**ПЕРЕЛИ́ВЧАТЫЙ**, -ая, -ое (*о красках*) төрлөләп (төрлө төҫкә инеп) емелдәгән; (*о звуках*) төрлөсә (төрлө тауыштар менән) яңғыраған; **перели́вчатые кра́ски** төрлөләп емелдәгән төҫтәр; **перели́вчатый го́лос** төрлө тауыштар менән яңғыраған тауыш

**ПЕРЕЛИСТА́ТЬ** *сов. что* **1.** (биттәрен) аҡтарып сығыу (асҡылап ҡарау, асып ҡарау); **перелиста́ть страни́цы кни́ги** китаптың биттәрен асып ҡарау **2.** (*бегло прочитать*) күҙ йүгертеп сығыу

**ПЕРЕЛИ́СТЫВАТЬ** *несов. см.* **перелиста́ть**

**ПЕРЕЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** бушатыу, ҡойоу, ағыҙыу; **перели́ть молоко́ из буты́лки в кастрю́лю** һөттө шешәнән кәстрүлгә бушатыу **2.** аштыра (алҡындыра) ҡойоу; **перели́ть че́рез край** алҡындыра ҡойоу **3.** (*ввести с лечебной целью*) ебәреү; **перели́ть ра́неному кровь** яралыға ҡан ебәреү **4.** (*отлить заново*) (иретеп) ҡайтанан (яңынан) ҡойоу; **перели́ть ста́тую** һынды ҡайтанан ҡойоу

**ПЕРЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бушатылыу, ҡойолоу, ағыҙылыу; **вода́ по тру́бам перельётся на поля́** һыу торбалар буйлап баҫыуҙарға ағыҙыла **2.** ашыу, артылыу; **вода́ перелила́сь че́рез край ва́нны** һыу ванна ситенән артылған

**ПЕРЕЛИЦЕВА́ТЬ** *сов. что* әйләндереп тегеү; **перелицева́ть пальто́** пальтоны әйләндереп тегеү

**ПЕРЕЛИЦО́ВКА** *ж см.* **перелицева́ть** — **перелицо́вывать**; **перелицо́вка костю́ма** костюмды әйләндереп тегеү

**ПЕРЕЛИЦО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **перелицева́ть**

**ПЕРЕЛОВИ́ТЬ** *сов. кого-что* тотоп бөтөрөү; **переलови́ть беглецо́в** ҡасҡындарҙы тотоп бөтөрөү

**ПЕРЕЛОЖЕ́НИЕ** *с см.* **переложи́ть** 6

**ПЕРЕЛОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* күсереп һалыу (ҡуйыу); **переложи́ть кни́ги из шка́фа на по́лки** китаптарҙы шкафтан кәштәләргә күсереп ҡуйыу **2.** *что, на кого-что* йөкмәтеү, тағыу; **переложи́ть часть рабо́ты на помо́щника** эштең бер өлөшөн ярҙамсыға йөкмәтеү **3.** *что, чем* аралаштырып һалыу; **переложи́ть посу́ду соло́мой** һауыт-һабаны һалам менән аралаштырып һалыу **4.** *что* (*сложить заново, иначе*) яңынан (башҡаса) һалыу; **переложи́ть сте́ну** стенаны яңынан һалыу **5.** *что, чего*; *разг.* саманан тыш (артыҡ) һалыу; **переложи́ть пе́рцу в суп** ашҡа боросто саманан артыҡ һалыу **6.** *что*; *муз., лит.* **переложи́ть стихи́ на му́зыку** шиғырҙы көйгә һалыу

**ПЕРЕЛО́М** *м* **1.** *см.* **переломи́ть** — **перела́мывать** 1, **переломи́ться** — **перела́мываться** 1; **2.** (*место*) һынған урын **3.** (*повреждение какой-л. кости*) һыныу; **закры́тый перело́м бедра́** боттоң эстән һыныуы **4.** *перен.* (*резкое изменение*) һынылыш; **нра́вственный перело́м** әхлаҡи һынылыш; **перело́м в хо́де боле́зни** ауырыу барышындағы һынылыш

**ПЕРЕЛОМА́ТЬ** *сов. что* һындырыу (*бер нисә урындан*), ватып (емереп, һындырып, ҡыйратып) бөтөрөү; **перелома́ть все игру́шки** бөтә уйынсыҡтарҙы ватып бөтөрөү

**ПЕРЕЛОМА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һынып (ватылып, емерелеп) бөтөү; **карандаши́ перелома́лись** ҡәләмдәр һынып бөттө

**ПЕРЕЛОМИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* һындырыу, һындырып сығарыу (*урталай, икегә һ.б.*); **переломи́ть па́лку** таяҡты һындырыу **2.** *кого-что*; *перен.* һындырыу, ҡырҡа үҙгәртеү; **переломи́ть хара́ктер ребёнка** баланың холҡон ҡырҡа үҙгәртеү **3.** *что*; *перен., разг.* (*преодолеть*) еңеү, еңеп сығыу; **переломи́ть сон** йоҡоно еңеү; **переломи́ть боле́знь** сирҙе еңеп сығыу

**ПЕРЕЛОМИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һыныу, һынып сығыу (*урталай, икегә һ.б.*); **трость переломи́лась** таяҡ урталай һынды **2.** *перен., разг.* ҡырҡа үҙгәреү; **хара́ктер ма́льчика переломи́лся** малайҙың холҡо ҡырҡа үҙгәрҙе **3.** *разг.* (*резко пойти на убыль*) һындырыу, үтеп китеү; **ночь переломи́лась** төн үтеп китте

**ПЕРЕЛО́МНЫЙ**, -ая, -ое һынылыш ...ы; **перело́мный пери́од** һынылыш осоро

**ПЕРЕМА́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* яңынан (ҡайтанан) һылау (буяу); **перема́зать око́нные ра́мы** тәҙрә ҡыҫандарын ҡайтанан һылау **2.** *что* (*намазать всё, многое*) һылап (буяп) сығыу; **перема́зать ра́мы** ҡыҫандарҙы һылап сығыу **3.** *кого-что*; *разг.* бысратып (буяп) бөтөрөү; **перема́зать па́льцы черни́лами** бармаҡтарҙы ҡараға буяп бөтөрөү

**ПЕРЕМА́ЗАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* буялып (бысранып) бөтөү; **перема́заться са́жей** ҡоромға буялып бөтөү

**ПЕРЕМА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **перема́зать**

**ПЕРЕМА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перема́заться** **2.** *страд. от* **перема́зывать**

**ПЕРЕМА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **перемоло́ть**

**ПЕРЕМА́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перемоло́ться 2.** *страд. от* **перема́лывать**

**ПЕРЕМА́НИВАТЬ** *несов. см.* **перемани́ть**

**ПЕРЕМАНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡыҙыҡтырып үҙеңә ылыҡтырыу (алыу), үҙ яғыңа ауҙарыу (йәлеп итеү); **перемани́ть специали́ста** белгесте ҡыҙыҡтырып үҙеңә алыу

**ПЕРЕМА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **перемота́ть**

**ПЕРЕМА́ХИВАТЬ** *несов. см.* **перемахну́ть**

**ПЕРЕМАХНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что*, *через что* һикереп (ырғып) сығыу; **перемахну́ть че́рез забо́р** ҡойманы һикереп сығыу **2.** (*переехать в новое место*) китеп барыу, ысҡыныу, күсенеү

**ПЕРЕМЕЖА́ТЬ** *несов.* аралаштырыу, сиратлаштырыу, ҡатнаштырыу; **перемежа́ть рабо́ту с о́тдыхом** эште ял менән сиратлаштырыу

**ПЕРЕМЕЖА́ТЬСЯ** *несов.* аралашыу, алмашыныу, сиратлашыу, ҡатнашыу; **расска́з перемежа́лся с пе́сней** хикәйә йыр менән сиратлашты; **зной перемежа́ется с прохла́дой** эҫелек еләҫ һауа менән алмашына

**ПЕРЕМЕЖА́ЮЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся **1.** *прич. от* **перемежа́ться 2.** *прил.* алмашынып торған, әленән-әле (ваҡыт-ваҡыт) ҡабатланып торған; **перемежа́ющаяся лихора́дка** *мед.* ваҡыт-ваҡыт ҡабатланып торған биҙгәк

**ПЕРЕМЕЖЕВА́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡайтанан (яңынан) межалап сығыу; **перемежева́ть зе́млю** ҡайтанан межалап сығыу **2.** (*размежевать всё, многое*) межалап сығыу (бөтөү)

**ПЕРЕМЕЖЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **перемежева́ть**

**ПЕРЕМЕ́НА** *ж* **1.** *см.* **перемени́ть – переменя́ть, перемени́ться – переменя́ться 2.** (*то, что переменилось*) үҙгәреш, үҙгәреү, алмашыныу; **в жи́зни без переме́н** тормошта үҙгәреш юҡ; **ре́зкая переме́на температу́ры** температураның ҡапыл үҙгәреүе **3.** *разг.* (*сменный комплект одежды*) алмаш кейем **4.** (*перерыв между уроками*) тәнәфес; **больша́я переме́на** ҙур тәнәфес

**ПЕРЕМЕНИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*сменить*) алмаштырыу; **перемени́ть рабо́ту** эште алмаштырыу; **перемени́ть кни́гу в библиоте́ке** китапханала китап алмаштырыу **2.** (*изменить*) үҙгәртеү; **перемени́ть причёску** причёсканы үҙгәртеү; **перемени́ть мне́ние** фекерҙе үҙгәртеү

**ПЕРЕМЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** үҙгәреү; **пого́да перемени́лась** һауа торошо үҙгәрҙе; **жизнь перемени́лась** тормош үҙгәрҙе **2.** *разг.* алмашыныу; **дире́ктор перемени́лся** директор алмашынды **3.** *к кому* (*изменить своё отношение*) мөнәсәбәтте үҙгәртеү **4.** *чем*; *разг.* (*обменяться*) алмашыу; **перемени́ться места́ми** урындарҙы алмашыу; **перемени́ться роля́ми** ролдәрҙе алмашыу

**ПЕРЕМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое алмашыныусан, үҙгәреүсән, үҙгәрешле; **переме́нный ве́тер** үҙгәреүсән ел; **переме́нная пого́да** алмашыныусан һауа торошо ♦ **переме́нная величина́** *мат.* үҙгәреүсән дәүмәл; **переме́нный капита́л** *эк.* үҙгәреүсән капитал; **переме́нный ток** *эл.* алмаш ток

**ПЕРЕМЕ́НЧИВОСТЬ** *ж*; *разг.* алмашыныусанлыҡ, үҙгәреүсәнлек; **переме́нчивость пого́ды** һауаның алмашыныусанлығы

**ПЕРЕМЕ́НЧИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* алмашыныусан, үҙгәреүсән; **переме́нчивый хара́ктер** үҙгәреүсән холоҡ

**ПЕРЕМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **перемени́ть** 1

**ПЕРЕМЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перемени́ться** 1, 2, 4; **2.** *страд. от* **переменя́ть**

**ПЕРЕМЕРЗА́ТЬ** *несов. см.* **перемёрзнуть**

**ПЕРЕМЁРЗНУТЬ** *сов.* **1.** туңыу, өшөү, туңып (өшөп) бөтөү; **все цветы́ перемёрзли** бөтә сәскә туңып бөткән **2.** *разг.* ныҡ өшөү; **я перемёрз в доро́ге** мин юлда ныҡ өшөнөм **3.** (*о водоёмах*) ҡуша (үтә) туңыу; **о́зеро перемёрзло** күл үтә туңған

**ПЕРЕМЕ́РИТЬ** и *разг.* **ПЕРЕМЕ́РЯТЬ** *сов. что* **1.** (*измерить ещё раз*) яңынан (ҡайтанан) үлсәү; **переме́рить расстоя́ние** араны яңынан үлсәү **2.** (*примерить заново*) яңынан (ҡабаттан) кейеп ҡарау; **переме́рить костю́м** костюмды яңынан кейеп ҡарау **3.** (*измерить всё, многое*) үлсәп сығыу; **переме́рить посевну́ю пло́щадь** сәсеү майҙанын үлсәп сығыу **4.** (*примерить всё, многое*) кейеп ҡарау; **переме́рить шля́пы** эшләпәләрҙе кейеп ҡарау

**ПЕРЕМЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **переме́рить**

**ПЕРЕМЕСИ́ТЬ** *сов. что* баҫып ҡуйыу; **перемеси́ть гли́ну** балсыҡты баҫып ҡуйыу

**ПЕРЕМЕСТИ́ТЬ** *сов. кого-что* күсереү, күсереп ҡуйыу; **перемести́ть шкаф** шкафты күсереп ҡуйыу; **перемести́ть на другу́ю рабо́ту** икенсе эшкә күсереү

**ПЕРЕМЕСТИ́ТЬСЯ** *сов.* күсеү, урын алмаштырыу

**ПЕРЕМЁТ** *м*; *рыб.* йәтмә, еле; **ста́вить перемёт** еле һалыу

**ПЕРЕМЕТА́ТЬ I** *сов. что* **1.** (*сложить заново*) ҡабаттан (яңынан) өйөү (һалыу); **перемета́ть стог** кәбәнде ҡабаттан (ҡайтанан) өйөү **2.** (*сложить всё, многое*) өйөп (һалып, ҡуйып) бөтөрөү; **перемета́ть всё се́но в стога́** бөтә бесәнде кәбәнгә һалып бөтөрөү

**ПЕРЕМЕТА́ТЬ II** *сов. что* **1.** (*сметать заново, иначе*) ҡабаттан (ҡайтанан, яңынан, башҡаса) типсеп (йүрмәп) сығыу; **перемета́ть пе́тлю** ҡаптырманы ҡайтанан типсеп сығыу **2.** (*наметать или обметать всё, многое*) типсеп (йүрмәп) сығыу; **перемета́ть все швы** бөтә йөйҙө йүрмәп сығыу

**ПЕРЕМЕ́ТИТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*пометить заново, иначе*) яңынан (ҡайтанан, ҡабаттан, тағы ла) билгеләп (билдәләп) сығыу; **переме́тить носовы́е платки́** ҡулъяулыҡтарҙы яңынан билгеләп сығыу **2.** (*пометить всё, многое*) бил-

гелəп (билдə ҡуйып, билдəлəп) сығыу; **перемéтить всё бельё** бөтə эске кейемгə билдə ҡуйып сығыу

**ПЕРЕМЕТНУ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*перепрыгнуть*) һикереп (ырғып) сығыу; **переметну́ться чéрез ручéй** шишмəне һикереп сығыу **2.** *неодобр.* (*перейти к кому-чему-л. другому*) ҡасып сығыу; **переметну́ться на стóрону прóтивника** дошман яғына ҡасып сығыу

**ПЕРЕМЁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йəтмə ...ы, еле ...ы; **перемётный крючóк** еле ҡармағы **2.** аша һалмалы, аҫмалы; **перемётная су́мка** аша һалынмалы сумка ♦ **су́ма перемётная** *презр.* аумаҡай (кеше)

**ПЕРЕМЁТЫВАТЬ I** *несов. см.* **переметáть** I

**ПЕРЕМЁТЫВАТЬ II** *несов. см.* **переметáть** II

**ПЕРЕМЁТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переметну́ться 2.** *страд. от* **перемётывать** I

**ПЕРЕМЕШÁТЬ** *сов. что* **1.** болғау; (*поленья, угли и т.д.*) ҡағыштырыу; **перемешáть кáшу** бутҡаны болғау; **перемешáть у́гли** ҡуҙҙы ҡағыштырыу **2.** (*нарушить порядок*) бутау, ҡушыу; **перемешáть кни́ги** китаптарҙы бутау **3.** *с чем* (*смешать*) ҡатнаштырыу, аралаштырыу, бутау; **перемешáть цемéнт с пескóм** цементты ҡом менəн ҡатнаштырыу **4.** *разг.* (*спутать*) бутау

**ПЕРЕМЕШÁТЬСЯ** *сов.* **1.** буталыу, аралашыу, ҡатнашыу; **мукá перемешáлась с крупóй** он ярма менəн ҡатнашҡан **2.** *перен.* буталыу; **всё в головé перемешáлось** башта бөтəһе буталып бөттө

**ПЕРЕМÉШИВАТЬ I** *несов. см.* **перемеси́ть**

**ПЕРЕМÉШИВАТЬ II** *несов. см.* **перемешáть**

**ПЕРЕМЕЩÁТЬ** *несов. см.* **перемести́ть**

**ПЕРЕМЕЩÁТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перемести́ться 2.** *страд. от* **перемещáть**

**ПЕРЕМЕЩÉНИЕ** *с см.* **перемести́ть** – **перемещáть**, **перемести́ться** – **перемещáться**; **перемещéние тéла в прострáнстве** есемдең арауыҡта урын алмаштырыуы; **перемещéние по слу́жбе** хеҙмəт буйынса күсереү (күсеү)

**ПЕРЕМЕЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **перемести́ть 2.** *в знач. сущ.* **перемещённые** *мн. см.* **перемещённые ли́ца** ♦ **перемещённые ли́ца** ирекһеҙлəп үҙ иленəн алып кителгəн кешелəр

**ПЕРЕМИ́ГИВАТЬСЯ** *несов.* күҙ ҡыҫышыу; **переми́гиваться с подру́жками** əхирəттəр менəн күҙ ҡыҫышыу

**ПЕРЕМИГНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **переми́гиваться**

**ПЕРЕМИНÁТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перемя́ться 2.** алмашлап баҫып тороу, тапаныу; **перемина́ться с ноги́ нá ногу** аяҡтарҙы алмашлап баҫып тороу **3.** *разг.* (*от смущения и т.п.*) (ҡаушап, ҡыйыуһыҙланып) бер урында тапанып тороу

**ПЕРЕМИ́РИЕ** *с* ваҡытлы килешеү (солох); **заключи́ть переми́рие** ваҡытлы килешеү төҙөү; **услóвия переми́рия** ваҡытлы килешеү шарттары

**ПЕРЕМНОЖÁТЬ** *несов. см.* **перемнóжить**

**ПЕРЕМНÓЖИТЬ** *сов. что* ҡабатлау, ҡабатлап сығыу (*бер нисə һанды үҙ-ара*)

**ПЕРЕМОГÁТЬ** *несов. что*; *разг.* сыҙау, түҙеү, сыҙап (түҙеп) тороу, еңеү, еңеп сығыу; **перемогáть боль** ауыртыуға түҙеү; **перемогáть сон** йоҡоно еңеү

**ПЕРЕМОГÁТЬСЯ** *несов.*; *разг.* сыҙарға (түҙергə, бирешмəҫкə) тырышыу (*ауыртыуға, һыҙлауға һ.б.*)

**ПЕРЕМОКÁТЬ** *несов. см.* **перемóкнуть**

**ПЕРЕМÓКНУТЬ** *сов.*; *разг.* лыс һыу булыу, ныҡ еүешлəнеү; **все вéщи перемóкли** бөтə нəмə лыс һыу булды

**ПЕРЕМÓЛ** *м см.* **перемолóть** – **перемáлывать**; **пусти́ть зернó в перемóл** ашлыҡты тартыуға ебəреү

**ПЕРЕМОЛÁЧИВАТЬ** *несов. см.* **перемолоти́ть**

**ПЕРЕМÓЛВИТЬСЯ** *сов. чем* и *без доп.*; *разг.* һүҙ ҡатышыу, һөйлəшеп алыу; **нé с кем слóвом перемóлвиться** һүҙ ҡатышыр кеше юҡ

**ПЕРЕМОЛОТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*всё, многое*) һуғып бөтөрөү; **перемолоти́ть всю пшени́цу** бойҙайҙы һуғып бөтөрөү **2.** (*обмолотить заново*) яңынан (ҡабаттан) һуғыу

**ПЕРЕМОЛÓТЬ** *сов. что* (*всё, многое*) тарттырып (тартып) бөтөрөү; **перемолóть зернó** игенде тартып бөтөрөү

**ПЕРЕМОЛÓТЬСЯ** *сов.* **1.** тартылып бөтөү; **всё зернó перемолóлось** бөтə ашлыҡ тартылып бөттө **2.** *в 3 л. ед. ч. буд. вр.* **перемéлется**; *разг.* тора-бара рəтлəнер əле, бер яйы сығыр əле, йəн биргəнгə йүн биргəн ♦ **(всё) перемéлется** – **мукá бу́дет** *см.* **перемолóться** 2

**ПЕРЕМОНТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* яңынан (киренəн) йыйыу (ҡороу, монтажлау); **перемонти́ровать прибóр** приборҙы яңынан ҡороу; **перемонти́ровать фильм** фильмды яңынан монтажлау

**ПЕРЕМОНТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **перемонти́ровать**

**ПЕРЕМОРИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡырып (үлтереп) бөтөү

**ПЕРЕМОТÁТЬ** *сов. что* **1.** урау (*икенсе нəмəгə* ); **перемотáть ни́тки с клубкá на кату́шку** епте йомғаҡтан кəтүккə урау **2.** (*смотать заново*) яңынан (ҡабаттан, ҡайтанан, киренəн) урау; **перемотáть шерсть** йөндө ҡабаттан урау **3.** (*смотать всё, многое*) урап бөтөрөү

**ПЕРЕМÓТКА** *ж см.* **перемотáть** – **перемáтывать**; **перемóтка ни́ток** епте урау

**ПЕРЕМОЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*намочить всё, многое*) еүешлəп бөтөрөү, лыс һыу итеү; **перемочи́ть óбувь** аяҡ кейемен еүешлəп бөтөрөү **2.** (*испортить долгим мочением*) артыҡ ныҡ ебетеү; **перемочи́ть лён** етенде артыҡ ныҡ ебетеү

**ПЕРЕМÓЧЬ** *сов. см.* **перемогáть**

**ПЕРЕМÓЧЬСЯ** *сов. см.* **перемогáться**

**ПЕРЕМУДРИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* үтә хикмәтләндереп (арттырып) ебәреү

**ПЕРЕМУ́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* яфаланып (ыҙаланып, ғазапланып) бөтөү

**ПЕРЕМЫВА́ТЬ** *несов. см.* **перемы́ть ♦ перемыва́ть ко́сточки** *кому* ғәйбәт һатыу

**ПЕРЕМЫ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*вымыть заново*) ҡайтанан (киренән, яңынан) йыуыу; **перемы́ть пол** иҙәнде киренән йыуыу **2.** (*вымыть всё, многое*) йыуып бөтөрөү (сығыу); (*детей*) йыуындырып бөтөрөү (*балаларҙы*)

**ПЕРЕМЫ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*вымыться заново*) киренән (ҡабаттан) йыуыныу **2.** (*о всех, многих*) йыуынып бөтөү; **все перемы́лись** бөтәһе лә йыуынып бөттө

**ПЕРЕМЫ́ЧКА** *ж* **1.** (*перехват*) тоташтырғыс, беркеткес **2.** (*заграждение*) кәртә, быуа (*төҙөлөш эшендә һыуҙы бүлеп тороу өсөн махсус кәртә*) **3.** (*перекрытие оконных, дверных и т.п. проёмов*) (тәҙрә, ишек) башы (арҡаһы)

**ПЕРЕМЯ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*измять всё, многое*) иҙеп (тапап, таушалдырып, йомарлап) бөтөрөү; **перемя́ть бельё** эске кейемде таушалдырып бөтөрөү; **перемя́ть траву́** үләнде тапап бөтөрөү **2.** (*размять заново*) киренән (ҡабат, тағы, яңынан) иҙеү; **перемя́ть гли́ну** балсыҡты киренән иҙеү (баҫыу)

**ПЕРЕМЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* иҙелеп (таушалып, йомарланып, ойпаланып) бөтөү; **пла́тье перемя́лось** күлдәк таушалып бөткән

**ПЕРЕНАПРЯГА́ТЬ** *несов. см.* **перенапря́чь**

**ПЕРЕНАПРЯГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перенапря́чься 2.** *страд. от* **перенапряга́ть**

**ПЕРЕНАПРЯЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **перенапря́чь** — **перенапряга́ть**, **перенапря́чься** — **перенапряга́ться 2.** *эл.* юғары көсөргәнеш

**ПЕРЕНАПРЯ́ЧЬ** *сов. что* артыҡ көсөргәнеү, көс һалыу

**ПЕРЕНАПРЯ́ЧЬСЯ** *сов.* үтә көсөргәнеү, көс һалыу

**ПЕРЕНАСЕЛЕ́НИЕ** *с* халыҡ артыҡлығы, халыҡтың үтә күплеге

**ПЕРЕНАСЕЛЁННОСТЬ** *ж* халыҡ артыҡлығы, халыҡ күплеге; **перенаселённость го́рода** ҡалала халыҡ күплеге

**ПЕРЕНАСЕЛЁННЫЙ**, -ая, -ое **1.** *прич. от* **перенасели́ть 2.** *прил.* халҡы артыҡ тығыҙ булған (урынлашҡан); **перенаселённый райо́н** халҡы артыҡ тығыҙ булған район

**ПЕРЕНАСЕЛИ́ТЬ** *сов. что* халыҡты артыҡ тығыҙ урынлаштырыу

**ПЕРЕНАСЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **перенасели́ть**

**ПЕРЕНАСЫ́ТИТЬ** *сов. что* үтә ныҡ туйындырыу; **перенасы́тить раство́р со́лью** иретмәне тоҙға үтә ныҡ туйындырыу

**ПЕРЕНАСЫЩА́ТЬ** *несов. см.* **перенасы́тить**

**ПЕРЕНА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **переноси́ть** II 2

**ПЕРЕНЕСЕ́НИЕ** *с см.* **перенести́** — **переноси́ть** I

**ПЕРЕНЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* күсереү, (күсереп) сығарыу, алып сығыу; **перенести́ че́рез доро́гу** юл аша алып сығыу **2.** *кого-что* (урынынан) күсереү, ташыу; **перенести́ ве́щи в ко́мнату** әйберҙәрҙе бүлмәгә ташыу **3.** *кого-что*; *перен.* алып китеү, йүнәлдереү; **мы́сли перенесли́ его́ в про́шлое** уйҙары уны үткәндәргә алып китте **4.** *что*; *в разн. знач.* күсереү; **перенести́ столи́цу в друго́й го́род** баш ҡаланы бүтән ҡалаға күсереү; **перенести́ воро́та леве́е** ҡапҡаны һулғараҡ күсереү; **перенести́ внима́ние на друго́е** иғтибарҙы икенсе нәмәгә күсереү; **перенести́ продолже́ние рома́на в сле́дующий но́мер** романдың дауамын киләһе һанға күсереү; **перенести́ усло́вные обозначе́ния на ка́рту** шартлы билдәләрҙе картаға күсереү **5.** *что* (*испытать*) баштан үткәреү (кисереү), үткәреү; **перенести́ воспале́ние лёгких** үпкә шешеүен үткәреү; **перенести́ мно́го го́ря** күп ҡайғы кисереү **6.** *что* (*выдержать*) сыҙап (түҙеп) тороу, сыҙау, үткәреү, күтәреү; **расте́ния легко́ перенесли́ за́суху** үҫемлектәр ҡоролоҡто еңел үткәрҙе; **он не мог перенести́ э́того оскорбле́ния** ул был дай мәсхәрәне күтәрә алманы

**ПЕРЕНЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** *разг.* (*быстро переместиться*) бик тиҙ (елдереп) барыу, елдереп үтеү **2.** (*переключиться — о мыслях, интересах и т.п.*) (икенсегә) күсеү; **внима́ние перенесло́сь на друго́е** иғтибар икенсегә күсте **3.** (*представить себя в другом месте, положении и т.п.*) әйләнеп ҡайтыу, ҡуйып ҡарау, күҙ алдына килтереү; **он мы́сленно перенёсся в де́тство** ул уйы менән бала сағына әйләнеп ҡайтты

**ПЕРЕНИМА́ТЬ** *несов. см.* **переня́ть**

**ПЕРЕНО́С** *м* **1.** *см.* **перенести́** 1—5 — **переноси́ть** I 1; **2.** (*знак*) һыҙыҡса (*һүҙҙе икенсе юлға күсереү билдәһе*)

**ПЕРЕНОСИ́МОСТЬ** *ж* сыҙай (кисерә, күтәрә, түҙә) алыусанлыҡ; **переноси́мость органи́зма** организмдың күтәрә алыусанлығы

**ПЕРЕНОСИ́ТЬ I** *несов.* **1.** *см.* **перенести́ 2.** *кого-чего* (*с отрицанием "не"*) яратмау, йәне һөймәү

**ПЕРЕНОСИ́ТЬ II** *сов. кого-что* **1.** ташып (күсереп) бөтөрөү; **переноси́ть ве́щи в ваго́н** әйберҙәрҙе вагонға ташып бөтөрөү **2.** (*ребёнка — о беременной*) артыҡ йөрөтөү

**ПЕРЕНОСИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перенести́сь 2.** *страд. от* **переноси́ть** I

**ПЕРЕНО́СИЦА** *ж* танау биле

**ПЕРЕНО́СКА** *ж см.* **перенести́** 1—3 — **переноси́ть** I 1; **перено́ска ме́бели** мебель күсереү

**ПЕРЕНОСНО́Й**, -ая, -ое күсермәле, күсерелмәле, күсереп йөрөтмәле; (*о лодке*) аша сығара (ташый) торған; **переносна́я ла́мпа** күсермәле лампа

**ПЕРЕНО́СНЫЙ**, -ая, -ое **1.** *см.* **переносно́й**; **перено́сная ло́дка** аша сығара торған кәмә **2.** (*не буквальный*) күсмә; **употреби́ть сло́во в пере-**

**но́сном значе́нии** һүҙҙе күсмә мәғәнәлә ҡулланыу

**ПЕРЕНО́СЧИК** *м* **1.** ташыусы, күсереүсе; **перено́счик тя́жестей** ауыр нәмәләр ташыусы **2.** *чего* таратыусы, йоҡтороусы; **перено́счики боле́зней** ауырыу таратыусылар

**ПЕРЕНОЧЕВА́ТЬ** *сов.* йоҡлап (ҡунып) сығыу, төн үткәреү

**ПЕРЕНУМЕРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*пронумеровать заново*) киренән (яңынан) нумерлау; **перенумерова́ть бума́ги** ҡағыҙҙарҙы киренән нумерлау **2.** (*пронумеровать всё, многое*) нумерлап бөтөү, нумер һуғып сығыу

**ПЕРЕНУМЕРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **перенумерова́ть**

**ПЕРЕНЯ́ТЬ** *сов. что* үҙләштереү, отоп алыу; **переня́ть о́пыт** тәжрибә үҙләштереү; **переня́ть у ста́рших стари́нные пе́сни** ололарҙан боронғо йырҙарҙы отоп алыу

**ПЕРЕОБОРУ́ДОВАНИЕ** *с см.* **переобору́довать**

**ПЕРЕОБОРУ́ДОВАТЬ** *сов., несов. что* киренән (яңынан, ҡайтанан) йыһазландырыу; **переобору́довать лаборато́рию** лабораторияны киренән йыһазландырыу

**ПЕРЕОБУВА́ТЬ** *несов. см.* **переобу́ть**

**ПЕРЕОБУВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переобу́ться 2.** *страд. от* **переобува́ть**

**ПЕРЕОБУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* икенсе аяҡ кейеме кейҙереү, аяҡ кейемен алмаштырыу; **переобу́ть дете́й** балаларға икенсе аяҡ кейеме кейҙереү **2.** *что* (сисеп, һалып) яңынан (киренән) кейенеү (кейеү); **переобу́ть сапоги́** итекте һалып яңынан кейеү

**ПЕРЕОБУ́ТЬСЯ** *сов.* аяҡ кейемен алмаштырып кейеү, аяҡты сисеп яңынан кейеү

**ПЕРЕОБУЧА́ТЬ** *несов. см.* **переобучи́ть**

**ПЕРЕОБУЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переобучи́ться 2.** *страд. от* **переобуча́ть**

**ПЕРЕОБУЧЕ́НИЕ** *с см.* **переобучи́ть** — **переобуча́ть, переобучи́ться** — **переобуча́ться**

**ПЕРЕОБУЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* яңынан (киренән, ҡабаттан) уҡытыу (өйрәтеү)

**ПЕРЕОБУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* яңынан (киренән, ҡабаттан, ҡайтанан) уҡыу (өйрәнеү)

**ПЕРЕОДЕВА́НИЕ** *с см.* **переодева́ть, переодева́ться**

**ПЕРЕОДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **переоде́ть**

**ПЕРЕОДЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переоде́ться 2.** *страд. от* **переодева́ть**

**ПЕРЕОДЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* кейемен (өҫтөн) алмаштырыу, икенсе кейем кейҙереү; **переоде́ть ребёнка** баланың өҫтөн алмаштырыу **2.** *что*; *разг.* алмаштырып кейеү, икенсе кейем кейеү; **переоде́ть пла́тье** күлдәк алмаштырып кейеү

**ПЕРЕОДЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *во что* и *без. доп.* кейемде (өҫтө) алмаштырыу, икенсе кейем кейеү; **переоде́ться в чи́стое пла́тье** таҙа күлдәк кейеү **2.** *в кого, кем* булып кейенеү, кейемен кейеү; **переоде́ться же́нщиной** ҡатын-ҡыҙ булып кейенеү

**ПЕРЕОСВИДЕ́ТЕЛЬСТВОВАНИЕ** *с см.* **переосвиде́тельствовать**; **назна́чить на переосвиде́тельствование** киренән ҡарауға (тикшереүгә) билдәләү

**ПЕРЕОСВИДЕ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* яңынан (киренән) ҡарау (тикшереү)

**ПЕРЕОСВИДЕ́ТЕЛЬСТВОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.*; *разг.* яңынан (ҡабаттан, киренән) ҡаралыу **2.** *несов. страд. от* **переосвиде́тельствовать**

**ПЕРЕОСНАСТИ́ТЬ** *сов. что* яңынан йыһазлау (йыһазландырыу); **переоснасти́ть предприя́тие** предприятиены яңынан йыһазландырыу

**ПЕРЕОСНАЩА́ТЬ** *несов. см.* **переоснасти́ть**

**ПЕРЕОХЛАДИ́ТЬ** *сов. кого-что* үтә ныҡ һыуытыу, артыҡ һыуытып ебәреү

**ПЕРЕОХЛАДИ́ТЬСЯ** *сов.* үтә ныҡ һыуыныу, артыҡ һыуынып китеү

**ПЕРЕОХЛАЖДА́ТЬ** *несов. см.* **переохлади́ть**

**ПЕРЕОХЛАЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переохлади́ться 2.** *страд. от* **переохлажда́ть**

**ПЕРЕОХЛАЖДЕ́НИЕ** *с* артыҡ һыуытып ебәреү, үтә ныҡ һыуытыу

**ПЕРЕОЦЕ́НИВАТЬ** *несов. см.* **переоцени́ть**

**ПЕРЕОЦЕНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*оценить заново*) киренән (яңынан) баһалау (хаҡ ҡуйыу); **переоцени́ть това́ры** тауарҙарға киренән (ҡайтанан) хаҡ ҡуйыу **2.** *кого-что* артыҡ баһалау, юғары баһа биреү; **переоцени́ть свои́ си́лы** үҙ көсөңдө артыҡ баһалау

**ПЕРЕОЦЕ́НКА** *ж см.* **переоцени́ть** — **переоце́нивать**; **переоце́нка до́ма** өйгә яңынан хаҡ ҡуйыу

**ПЕРЕПА́Д** *м* төшөү, кәмеү, һикереү (*температура, баҫым, бейеклек һ.б. кимәленең айырмаһы*)

**ПЕРЕПА́ДАТЬ** *сов.*; *разг.* ҡойолоп (төшөп) бөтөү; **кни́ги перепа́дали с по́лки** китаптар кәштәнән төшөп бөттө

**ПЕРЕПАДА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **перепа́сть 2.** (*об осадках*) төшкөләү, яуғылау, төшкөләп (яуғылап) ҡуйыу; **и́зредка перепада́ют дожди́** әллә ниҙә бер ямғыр яуғылай

**ПЕРЕПА́ИВАТЬ I** *несов. см.* **перепои́ть**

**ПЕРЕПА́ИВАТЬ II** *несов. см.* **перепая́ть**

**ПЕРЕПА́ЙКА** *ж см.* **перепая́ть** — **перепа́ивать** II

**ПЕРЕПА́ЛКА** *ж*; *разг.* **1.** атыш; **руже́йная перепа́лка** мылтыҡ атышы **2.** *перен.* (*перебранка, ссора*) талаш, әрләш-тиргәш

**ПЕРЕПА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **переполо́ть**

**ПЕРЕПА́РИВАТЬ** *несов. см.* **перепа́рить**

**ПЕРЕПА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перепа́риться 2.** *страд. от* **перепа́ривать**

**ПЕРЕПА́РИТЬ** *сов.* **1.** *что* парҙа артыҡ тотоу, артыҡ парлау; **перепа́рить свёклу** сөгөлдөрҙө артыҡ парлау **2.** *кого-что*; *разг.* (*в бане*) оҙаҡ сабындырып зыян килтереү **3.** *кого-что*; *разг.* (*всё, многое*) бешекләп бөтөрөү (сығыу)

**ПЕРЕПА́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о пище*) артыҡ бешекләнеү, артыҡ парланыу **2.** *разг.* (*в бане*) оҙаҡ сабынып зыян алыу

**ПЕРЕПА́РЫВАТЬ** *несов. см.* **перепоро́ть**

**ПЕРЕПА́СТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кому* (*достаться*) өлөшкә тейеү, эләгеү, тәтеү **2.** (*об осадках*) төшкөләү, яуғылау, төшкөләп (яуғылап) ҡуйыу

**ПЕРЕПАХА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*вспахать заново*) киренән (яңынан) һөрөү **2.** (*вспахать целиком*) һөрөп сығыу (бөтөрөү); **перепаха́ть доро́гу** юлды һөрөп бөтөрөү **3.** (*вспахивая, провести борозду поперёк чего-л.*) арҡырыға һөрөп (бураҙналап) бөтөрөү

**ПЕРЕПА́ХИВАТЬ** *несов. см.* **перепаха́ть**

**ПЕРЕПА́ЧКАТЬ** *сов. кого-что* бысратып бөтөрөү

**ПЕРЕПА́ЧКАТЬСЯ** *сов.* бысранып бөтөү

**ПЕРЕПА́ШКА** *ж*; *разг. см.* **перепаха́ть — перепа́хивать**

**ПЕРЕПАЯ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*запаять заново*) яңынан (киренән, ҡабаттан) йәбештереү (паятлау); **перепая́ть кастрю́лю** кәстрүлде яңынан йәбештереү **2.** (*запаять всё, многое*) йәбештереп (паятлап) сығыу (бөтөрөү)

**ПЕРЕПЕ́В** *м см.* **перепева́ть** 2

**ПЕРЕПЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **перепе́ть 2.** *что* (билдәлене) ҡабатлау

**ПЕРЕПЕКА́ТЬ** *несов. см.* **перепе́чь**

**ПЕРЕПЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перепе́чься 2.** *страд. от* **перепека́ть**

**ПЕ́РЕПЕЛ** *м* бүҙәнә, бытбылдыҡ; **перепёлка** *ж* инә бүҙәнә (бытбылдыҡ)

**ПЕРЕПЕЛЕНА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*запеленать заново*) ҡабаттан (яңынан) биләү; **перепелена́ть ребёнка** баланы ҡабаттан (киренән) биләү **2.** (*спеленать всех, многих*) биләп бөтөү (ҡуйыу)

**ПЕРЕПЕЛЁНЫВАТЬ** *несов. см.* **перепелена́ть**

**ПЕРЕПЕЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое бүҙәнә ...ы, бытбылдыҡ ...ы; **перепели́ное гнездо́** бүҙәнә ояһы; **перепели́ный крик** бытбылдыҡ тауышы

**ПЕРЕПЕЛЯ́ТНИК** *м* **1.** *зоол.* бүҙәнә (бытбылдыҡ) ҡарсығаһы **2.** *охот.* (бытбылдыҡ) аулаусы

**ПЕРЕПЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **переперчи́ть**

**ПЕРЕПЕ́РЧИТЬ** и **ПЕРЕПЕРЧИ́ТЬ** *сов. что* артыҡ ныҡ борослау

**ПЕРЕПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*спеть всё, многое*) йырлап бөтөү (сығыу) **2.** *кого*; *разг.* йырлауҙа уҙҙырыу, йырҙа өҫтөнлөк алыу

**ПЕРЕПЕЧА́ТАТЬ** *сов. что* **1.** (*напечатать заново*) ҡабаттан (яңынан) баҫтырыу (баҫыу); **перепеча́тать ста́рое изда́ние** иҫке баҫманы яңынан баҫтырыу **2.** (*на пишущей машинке*) күсереп баҫыу

**ПЕРЕПЕЧА́ТКА** *ж см.* **перепеча́тать — перепеча́тывать**; **перепеча́тка ру́кописи** ҡулъяҙманы яңынан баҫтырыу

**ПЕРЕПЕЧА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **перепеча́тать**

**ПЕРЕПЕ́ЧЬ** *сов. что* **1.** ныҡ бешереү, оҙағыраҡ ятҡырыу (*мейестә*) **2.** *разг.* (*испечь всё, многое*) бешереп бөтөрөү

**ПЕРЕПЕ́ЧЬСЯ** *сов.* үтә бешеү, оҙаҡ ятып ҡатыу (*мейестә*)

**ПЕРЕПИВА́ТЬ** *несов. см.* **перепи́ть**

**ПЕРЕПИВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **перепи́ться**

**ПЕРЕПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **перепили́ть**

**ПЕРЕПИЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** бысып сығарыу; **перепили́ть бревно́** бүрәнәне бысып сығарыу **2.** (*распилить всё, многое*) бысып бөтөрөү (сығыу)

**ПЕРЕПИСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*списать*) күсереп яҙыу; **переписа́ть стихотворе́ние** шиғырҙы күсереп яҙыу; **переписа́ть на́бело** аҡҡа күсереп яҙыу **2.** *что* (*составить документ заново, иначе*) ҡабаттан (яңынан) яҙыу **3.** *кого-что* яҙып алыу, исемлеккә теркәү; **переписа́ть прису́тствующих** килгәндәрҙе исемлеккә теркәү

**ПЕРЕПИ́СКА** *ж* **1.** *см.* **переписа́ть — перепи́сывать** 1; **2.** *собир.* (үҙ-ара яҙышҡан) хаттар; **изда́ть перепи́ску А.П.Чехова** А.П.Чеховтың хаттарын баҫтырып сығарыу

**ПЕРЕПИ́СЧИК** *м* и **ПЕРЕПИ́СЧИЦА** *ж* күсереп яҙыусы

**ПЕРЕПИ́СЫВАНИЕ** *с см.* **перепи́сывать**; **перепи́сывание роле́й** ролдәрҙе күсереп яҙыу

**ПЕРЕПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **переписа́ть**

**ПЕРЕПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *с кем* и *без доп.* хат яҙышыу (алышыу), хатлашыу **2.** *страд. от* **перепи́сывать**

**ПЕ́РЕПИСЬ** *ж* иҫәп (һан) алыу; **пе́репись населе́ния** халыҡ иҫәбен алыу

**ПЕРЕПИ́ТЬ** *сов. чего* и *без доп.*; *разг.* (*выпить слишком много*) самаһыҙ (артыҡ) эсеү; **перепи́ть на сва́дьбе** туйҙа артыҡ эсеү

**ПЕРЕПИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* эсеп иҫерешеү

**ПЕРЕПЛА́ВИТЬ I** *сов. что* **1.** ҡабаттан (яңынан) иретеү, иретеп ҡойоу; **перепла́вить пу́шки** туптарҙы иретеп ҡойоу **2.** (*плавкой обработать всё, многое*) иретеп бөтөрөү

**ПЕРЕПЛА́ВИТЬ II** *сов. что* ағыҙыу, ағыҙып бөтөрөү; **перепла́вить лес** ағас ағыҙыу

**ПЕРЕПЛА́ВИТЬСЯ** *сов.* иреп бөтөү (*металл нәмәләргә ҡарата*)

**ПЕРЕПЛАВЛЯ́ТЬ I** *несов. см.* **перепла́вить** I

**ПЕРЕПЛАВЛЯ́ТЬ II** *несов. см.* **перепла́вить** II

**ПЕРЕПЛАВЛЯ́ТЬСЯ I** *несов. страд. от* **переплавля́ть** I

**ПЕРЕПЛАВЛЯ́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **переплавля́ть** II

**ПЕРЕПЛАНИ́РОВАНИЕ** *с см.* **перепланиро́вать**

**ПЕРЕПЛАНИ́РОВАТЬ** *сов. что* ҡайтанан (яңынан) планлаштырыу; **перепланиро́вать рабо́ту** эште яңынан планлаштырыу

**ПЕРЕПЛАНИРО́ВКА** *ж см.* **перепланиро́вать**; **перепланиро́вка зда́ния** бинаны ҡайтанан планлаштырыу

**ПЕРЕПЛАНИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **перепланиро́вать**

**ПЕРЕПЛА́ТА** *ж* **1.** *см.* **переплати́ть** — **перепла́чивать** 1; **2.** *разг.* артыҡ (түләнгән) сумма

**ПЕРЕПЛАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* артыҡ түләү **2.** *что*; *разг.* түләүгә тотоноу

**ПЕРЕПЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **переплати́ть**

**ПЕРЕПЛЕСТИ́** *сов. что* **1.** төпләү, тышлау; **переплести́ кни́гу** китап(ты) төпләү **2.** (*соединить плетением*) үреү, үреп сығыу **3.** (*сцепить пальцы рук*) ҡаушырыу, салыштырыу **4.** *перен.* (*неразрывно соединить, связать*) бәйләнеү, бәйле булыу **5.** *чем* (*заплетая, вплести что-л.*) үреү; **переплести́ ко́сы ле́нтами** сәсте таҫма менән үреү **6.** (*сплести заново*) ҡабаттан (яңынан) үреү **7.** (*сплести всё, многое*) үреп бөтөрөү

**ПЕРЕПЛЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** (*сплестись*) үрелеп (сырмалып) бөтөү **2.** *перен.* (*соединиться в одно целое*) бергә ҡушылыу (буталыу)

**ПЕРЕПЛЁТ** *м* **1.** *см.* **переплести́** — **переплета́ть** 1; **отда́ть кни́гу в переплёт** китапты төпләргә биреү **2.** (*обложка*) тыш, китап тышы; **ко́жаный переплёт** күн тыш **3.** рәшәткә, рам; **око́нный переплёт** тәҙрә рәшәткәһе **4.** *перен.*, *разг.* буталсыҡ (ҡатмарлы, ауыр) хәл; **попа́сть в переплёт** буталсыҡ хәлгә килеп эләгеү

**ПЕРЕПЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **переплести́**

**ПЕРЕПЛЕТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переплести́сь** **2.** *страд. от* **переплета́ть**

**ПЕРЕПЛЕТЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **переплести́** — **переплета́ть** 2—5, **переплести́сь** — **переплета́ться**; **переплете́ние ни́тей** ептәр ишелеү **2.** үрелеш, ишелеш; **узо́рчатое переплете́ние** биҙәкле үрелеш

**ПЕРЕПЛЁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** төпләү ...ы, китап төпләү ...ы; **переплётное де́ло** китап төпләү эше; **переплётная маши́на** китап төпләү машинаһы **2.** *в знач. сущ.* **переплётная** *ж* китап төпләү оҫтаханаһы

**ПЕРЕПЛЁТЧИК** *м* и **ПЕРЕПЛЁТЧИЦА** *ж* китап төпләүсе

**ПЕРЕПЛЫВА́ТЬ** *несов. см.* **переплы́ть**

**ПЕРЕПЛЫ́ТЬ** *сов. что, через что* (аша) йөҙөп сығыу

**ПЕРЕПЛЮ́НУТЬ** сов. **1.** *разг.* (*плюнуть через что-л.*) (аша) төкөрөү **2.** *кого*; *прост.* арыраҡ (йырағыраҡ) төкөрөү **3.** *кого*; *перен.* (*превзойти кого-л. в чём-л.*) уҙҙырып ебәреү, өҫтөн сығыу

**ПЕРЕПОДГОТА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **переподгото́вить**

**ПЕРЕПОДГОТА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переподгото́виться** **2.** *страд. от* **переподгота́вливать**

**ПЕРЕПОДГОТО́ВИТЬ** *сов. кого-что* яңынан әҙерләү (уҡытыу), белемен арттырыу (күтәреү)

**ПЕРЕПОДГОТО́ВИТЬСЯ** *сов.* яңынан әҙерләнеү (уҡыу), белемде арттырыу (күтәреү)

**ПЕРЕПОДГОТО́ВКА** *ж см.* **переподгото́вить** — **переподготовля́ть** — **переподгота́вливать**, **переподгото́виться** — **переподготовля́ться** — **переподгота́вливаться**; **переподгото́вка учителе́й** уҡытыусыларҙың белемен күтәреү

**ПЕРЕПОДГОТОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **переподгото́вить**

**ПЕРЕПОДГОТОВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переподгото́виться** **2.** *страд. от* **переподготовля́ть**

**ПЕРЕПОИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*опоить*) артыҡ (күп) эсереү (эсереп ташлау); **перепои́ть ло́шадь** атҡа артыҡ күп эсереү **2.** *разг.* (*напоить до опьянения*) иҫертеү, артыҡ ныҡ иҫертеү

**ПЕРЕПО́Й: с перепо́я (перепо́ю)** *разг.* күп эсеүҙән, артыҡ иҫереүҙән

**ПЕРЕПОЛА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **переполоска́ть**

**ПЕРЕПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **переползти́**

**ПЕРЕПОЛЗТИ́** *сов.* **1.** *что, через что* шыуышып аша сығыу (үтеү); **переползти́ че́рез доро́гу** шыуышып юл аша сығыу **2.** *через что*; *разг.* (*с трудом перейти через что-л.*) көс-хәл менән сығыу (үтеү)

**ПЕРЕПОЛНЕ́НИЕ** *с см.* **перепо́лнить** — **переполня́ть**, **перепо́лниться** — **переполня́ться**

**ПЕРЕПО́ЛНИТЬ** *сов.* **1.** *что* артылдыра (алҡындыра, аштыра) һалыу (ҡойоу), ныҡ тултырыу, туп-тулы итеү, таштырыу; **перепо́лнить ведро́ молоко́м** һөттө күнәккә аштыра ҡойоу **2.** *кого-что*; *перен.* тултырыу, ҡаплап (солғап) алыу; **ра́дость перепо́лнила моё се́рдце** йөрәгемде шатлыҡ солғап алды

**ПЕРЕПО́ЛНИТЬСЯ** *сов.* **1.** ташыу, ашыу, артылыу, артыҡ тулыу **2.** *перен.* тулыу, тулышыу, эскә һыймау; **се́рдце перепо́лнилось го́рдостью** йөрәк ғорурлыҡ менән тулды

**ПЕРЕПОЛНЯ́ТЬ** *несов. см.* **перепо́лнить**

**ПЕРЕПОЛНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перепо́лниться** **2.** *страд. от* **переполня́ть**

**ПЕРЕПОЛОСКА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*выполоскать заново*) ҡабаттан (яңынан) сайҡау **2.** (*выполоскать всё, многое*) сайҡап бөтөү (сығыу)

**ПЕРЕПОЛО́ТЬ** *сов. что* **1.** (*выполоть заново*) киренән (яңынан, ҡабаттан, тағы ла) утау; **переполо́ть карто́фель** картуфты ҡабаттан утау

**2.** (*выполоть всё, многое*) утап бөтөрөү (сығыу); **переполо́ть все гря́дки** бөтә түтәлдәрҙе утап сығыу

**ПЕРЕПОЛО́Х** *м* ғауға, ығы-зығы, шау-шыу; **подня́ть переполо́х** ығы-зығы ҡуптарыу

**ПЕРЕПОЛОШИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ығы-зығы ҡуптарыу, ғауға һалыу, ғауғалау

**ПЕРЕПОЛОШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ығы-зығы килеү, ғауғалашыу; **переполоши́ться из-за пустяко́в** юҡ өсөн ығы-зығы килеү

**ПЕРЕПО́НКА** *ж* яры, пәрҙә, элпә; **пла́вательные перепо́нки** йөҙөү ярылары ♦ **бараба́нная перепо́нка** ҡолаҡ ярыһы

**ПЕРЕПОНЧАТОКРЫ́ЛЫЕ** *мн.*; *зоол.* ярыҡанатлылар (*бал ҡорто, һағыҙаҡ, иңкеш һ.б.*)

**ПЕРЕПО́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое ярылы; **перепо́нчатые плавники́** ярылы йөҙгөстәр

**ПЕРЕПОРО́ТЬ** *сов. что* һүтеп сығыу (бөтөрөү); **перепоро́ть швы** йөйҙәрҙе һүтеп сығыу

**ПЕРЕПО́РТИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* боҙоп бөтөрөү (ҡуйыу); **перепо́ртить рабо́ту** эште боҙоп бөтөрөү

**ПЕРЕПО́РТИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* боҙолоп бөтөү; **арбу́зы перепо́ртились** ҡарбуздар боҙолоп бөткән

**ПЕРЕПОРУЧА́ТЬ** *несов. см.* **перепоручи́ть**

**ПЕРЕПОРУЧИ́ТЬ** *сов. что, кому* йомошто (эште) башҡаға тапшырыу

**ПЕРЕПОЯ́САТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*опоясать*) билен быуыу (бәйләү) **2.** (*опоясать заново, иначе*) яңынан (яҡшылап) билен быуыу, билбауын яңынан бәйләү

**ПЕРЕПОЯ́САТЬСЯ** *сов. чем* и *без доп.* **1.** билде быуыу, билбау бәйләү **2.** билде яңынан (ҡайтанан) быуыу; **перепоя́саться поту́же** билде ҡайтанан тығыҙыраҡ быуыу

**ПЕРЕПОЯ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **перепоя́сать**

**ПЕРЕПОЯ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перепоя́саться 2.** *страд. от* **перепоя́сывать**

**ПЕРЕПРА́ВА** *ж* **1.** *см.* **перепра́вить** — **переправля́ть** I 1, **перепра́виться** — **переправля́ться** I; **2.** (*место*) кисеү, һыу аша сығыу урыны **3.** (*приспособление*) һыу аша сығыу ҡулайламаһы (*борам, кәмә һ.б.*)

**ПЕРЕПРА́ВИТЬ I** *сов. кого-что* **1.** аша сығарыу (үткәреү); **перепра́вить че́рез го́ры** тауҙар аша үткәреү **2.** ебәреү, ары оҙатыу; **перепра́вить письмо́ адреса́ту** хатты адресатына ебәреү

**ПЕРЕПРА́ВИТЬ II** *сов. что*; *разг.* **1.** (*исправить*) төҙәтеү, дөрөҫләү, йүнәтеү; **перепра́вить статью́** мәҡәләне төҙәтеү **2.** (*выправить всё, многое*) төҙәтеп (дөрөҫләп, йүнәтеп) ҡуйыу

**ПЕРЕПРА́ВИТЬСЯ** *сов.* аша сығыу; **перепра́виться че́рез ре́ку** йылға аша сығыу

**ПЕРЕПРА́ВКА I** *ж см.* **перепра́вить** I— **переправля́ть** I

**ПЕРЕПРА́ВКА II** *ж см.* **перепра́вить** II — **переправля́ть** II

**ПЕРЕПРАВЛЯ́ТЬ I** *несов. см.* **перепра́вить** I

**ПЕРЕПРАВЛЯ́ТЬ II** *несов. см.* **перепра́вить** II

**ПЕРЕПРАВЛЯ́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **перепра́виться 2.** *страд. от* **переправля́ть** I

**ПЕРЕПРАВЛЯ́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **переправля́ть** II

**ПЕРЕПРА́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое һыу аша сығыу ...ы, һыу аша сығыу өсөн; **перепра́вочные сре́дства** һыу аша сығыу кәрәк-яраҡтары

**ПЕРЕПРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **перепре́ть**

**ПЕРЕПРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое (үтә) янған, сереп (янып, күгәреп, бурһып, бәҫәреп) бөткән; **перепре́лый наво́з** үтә янған тиреҫ; **перепре́лое зерно́** янған иген

**ПЕРЕПРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** бәҫәреп (сереп, янып, бурһып, ҡыҙып, күгәреп) бөтөү; **соло́ма перепре́ла** һалам күгәреп бөткән **2.** (*упреть слишком сильно*) иҙелеп бөтөү; **ку́шанье перепре́ло** ашамлыҡ иҙелеп бөткән

**ПЕРЕПРО́БОВАТЬ** *сов. что* (барыһынан да) ашап (ҡабып, татып) ҡарау, (барыһынан да) ауыҙ итеү; **перепро́бовать все ку́шанья** ашамлыктың барыһынан да ауыҙ итеү

**ПЕРЕПРОДАВА́ТЬ** *несов. см.* **перепрода́ть**

**ПЕРЕПРОДА́ЖА** *ж см.* **перепрода́ть** — **перепродава́ть**

**ПЕРЕПРОДА́ТЬ** *сов. кого-что* алып һатыу, алғанды һатыу

**ПЕРЕПРОИЗВО́ДСТВО** *с* артыҡ етештереү (эшләп сығарыу)

**ПЕРЕПРУДИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* быуыу, быуып ҡуйыу; **перепруди́ть ре́ку** йылғаны быуып ҡуйыу

**ПЕРЕПРУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **перепруди́ть**

**ПЕРЕПРЫ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **перепры́гнуть**

**ПЕРЕПРЫ́ГНУТЬ** *сов.* **1.** *что, через что* (*перескочить*) (аша) һикереп (ырғып) сығыу; **перепры́гнуть че́рез забо́р** ҡойма аша һикереп сығыу; **перепры́гнуть кана́ву** канауҙы ырғып сығыу **2.** (*прыжком переместиться куда-л.*) һикереү, ырғыу; **перепры́гнуть с ка́мня на ка́мень** таштан ташҡа һикереү

**ПЕРЕПРЯГА́ТЬ** *несов. см.* **перепря́чь**

**ПЕРЕПРЯ́ТАТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*спрятать ещё раз*) яңынан (киренән, икенсе урынға) йәшереү **2.** *разг.* (*спрятать всё, многое*) йәшереп бөтөрөү (сығыу)

**ПЕРЕПРЯ́ТАТЬСЯ** *сов.* **1.** яңынан (ҡабаттан, киренән) йәшеренеү, икенсе урынға йәшенеү **2.** *разг.* (*обо всех, многих*) йәшенешеп бөтөү

**ПЕРЕПРЯ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **перепря́тать**

**ПЕРЕПРЯ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перепря́таться 2.** *страд. от* **перепря́тывать**

**ПЕРЕПРЯ́ЧЬ** *сов. кого* **1.** (*запрячь заново*) туғарып егеү, яңынан егеү **2.** (*запрячь, меняя лошадей*) алмаштырып егеү

**ПЕРЕПУ́Г** *м*; *разг.* ҡот алыныу, ныҡ ҡурҡыу, ҡурҡыш; **с перепу́гу** ныҡ ҡурҡыуҙан, ҡурҡыштан

**ПЕРЕПУГА́ТЬ** *сов. кого-что* ныҡ ҡурҡытыу, ҡотон алыу

**ПЕРЕПУГА́ТЬСЯ** *сов.* ныҡ ҡурҡыу, ҡот алыныу

**ПЕРЕПУ́ТАТЬ** *сов.* **1.** сейәлтеү, сеймәлтеү, сыуалтыу, сырмалтыу, сейәлтеп (сырмалтып) бөтөү; **перепу́тать ни́тки** епте сейәлтеп бөтөү **2.** (*перемешать*) бутау, ҡушыу, бутап (ҡушып) бөтөрөү **3.** бутап (яңылыштырып) бөтөрөү; **перепу́тать адреса́** адрестарҙы бутап бөтөрөү

**ПЕРЕПУ́ТАТЬСЯ** *сов.* **1.** сейәлеү, сеймәлеү, сыуалыу, сырмалыу, сейәлеп (сырмалып) бөтөү; **ни́тки перепу́тались** ептәр сейәлеп бөткән **2.** (*перемешаться*) буталыу, ҡушылыу **3.** *перен.* буталып (яңылышып) бөтөү; **мы́сли перепу́тались** фекерҙәр буталып бөттө

**ПЕРЕПУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **перепу́тать**

**ПЕРЕПУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перепу́таться 2.** *страд. от* **перепу́тывать**

**ПЕРЕПУ́ТЬЕ** *с* юл саты, юл айырыһы ♦ **на перепу́тье** ике арала, ҡайҙа китергә белмәйенсә, ҡайһыныһын һайларға белмәйенсә

**ПЕРЕРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **перерабо́тать**

**ПЕРЕРАБА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перерабо́таться 2.** *страд. от* **перераба́тывать** 1, 2

**ПЕРЕРАБО́ТАТЬ** *сов.* **1.** *что* эшкәртеү; **перерабо́тать не́фть** нефть эшкәртеү; **перерабо́тать статью́** мәҡәләне эшкәртеү **2.** *что* эшкәртеү, үҙләштереү, һеңдереү; **перерабо́тать пи́щу** ашты һеңдереү **3.** *что* и *без доп.* (*проработать дольше положенного*) артыҡ эшләү, оҙағыраҡ (күберәк) эшләү; **перерабо́тать два часа́** ике сәғәт артыҡ эшләү **4.** *разг.* (*переутомиться*) күп эшләп хәлдән тайыу, күп эшләп өҙлөгөү

**ПЕРЕРАБО́ТАТЬСЯ** *сов.* **1.** эшкәртелеү, үҙләштерелеү; **пи́ща перерабо́талась** аш эшкәртелде **2.** *см.* **перерабо́тать** 4

**ПЕРЕРАБО́ТКА** *ж* **1.** *см.* **перерабо́тать — перераба́тывать**, **перерабо́таться — перераба́тываться 2.** *разг* арттырып эшләнгән эш (ваҡыт); **уплати́ть за перерабо́тку** арттырып эшләнгән эш өсөн түләү **3.** (*то, что переработано*) эшкәртелгән нәмә

**ПЕРЕРАСПРЕДЕЛЕ́НИЕ** *с см.* **перераспредели́ть — перераспределя́ть**, **перераспредели́ться — перераспределя́ться**

**ПЕРЕРАСПРЕДЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* яңынан (ҡабаттан) бүлеү, башҡаса бүлеү; **перераспредели́ть сырьё ме́жду цеха́ми** сеймалды цехтар араһында ҡабаттан бүлеү

**ПЕРЕРАСПРЕДЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* яңынан (ҡабаттан) бүленеү, башҡаса бүленеү

**ПЕРЕРАСПРЕДЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **перераспредели́ть**

**ПЕРЕРАСПРЕДЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перераспредели́ться 2.** *страд. от* **перераспределя́ть**

**ПЕРЕРАСТА́НИЕ** *с см.* **перераста́ть**

**ПЕРЕРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **перерасти́**

**ПЕРЕРАСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* (буйға, буйға үҫеп) уҙып китеү; **сын переро́с отца́** улы атаһын буйға уҙып киткән **2.** *кого-что*; *перен.* (аҡыл үҫеше яғынан) уҙып китеү, өҫтөн булыу; **перерасти́ учи́теля** остазыңды уҙып китеү **3.** (*стать старше, чем требуется для чего-л.*) йәше уҙыу (үтеү, сығыу); **для де́тского са́да ребёнок переро́с** балалар баҡсаһына йөрөргә баланың йәше уҙған **4.** *во что* үҫеп -ға/-гә әүерелеү; **недово́льство переросло́ в раздраже́ние** ризаһыҙлыҡ үҫеп асыуға әүерелде

**ПЕРЕРАСХО́Д** *м* **1.** *см.* **перерасхо́довать 2.** артыҡ сығым; **допусти́ть перерасхо́д** артыҡ сығым ебәреү; **су́мма перерасхо́да** артыҡ сығымдың суммаһы

**ПЕРЕРАСХО́ДОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* артыҡ тотоноу (сығым яһау); **перерасхо́довать креди́ты** кредитты артыҡ тотоноу

**ПЕРЕРАСЧЁТ** *м* яңынан (ҡабаттан) иҫәпләү

**ПЕРЕРВА́ТЬ** *сов. что* **1.** өҙөү, өҙөп сығарыу; **перерва́ть верёвку** бауҙы өҙөп сығарыу **2.** *разг.* (*разъединить*) өҙөү, бүлеү; **перерва́ть телегра́фную связь** телеграф бәйләнешен өҙөү **3.** *разг.* (*разорвать всё, многое*) йыртып (йыртҡылап) бөтөрөү

**ПЕРЕРВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** өҙөлөү, өҙөлөп сығыу; **ле́нта перервала́сь** таҫма өҙөлдө **2.** *разг.* (*обо всём, многом*) өҙөлөп бөтөү; **все ни́тки перервали́сь** барлыҡ ептәр өҙөлөп бөттө

**ПЕРЕРЕГИСТРА́ЦИЯ** *ж* яңынан (ҡайтанан) регистрациялау (иҫәпкә алыу, теркәү); **перерегистра́ция чле́нов о́бщества** йәмғиәт ағзаларын ҡайтанан теркәү

**ПЕРЕРЕГИСТРИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* **1.** яңынан (киренән) регистрациялау (иҫәпкә алыу, теркәү, яҙыу); **перерегистри́ровать чита́телей библиоте́ки** китапхана уҡыусыларын яңынан теркәү **2.** (*зарегистрировать всё, всех*) регистрациялау, иҫәпкә алыу (алып бөтөрөү), теркәп сығыу (*барыһын да*); **перерегистри́ровать всех делега́тов** бөтә делегаттарҙы ла теркәп сығыу

**ПЕРЕРЕГИСТРИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* яңынан теркәлеү (иҫәпкә алыныу, регистрацияланыу); **перерегистри́роваться в спорти́вной се́кции** спорт секцияһында яңынан теркәлеү **2.** *несов. страд. от* **перерегистри́ровать**

**ПЕРЕРЕ́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡырҡып (киҫеп) өҙөү (сығарыу); **перере́зать верёвку** бауҙы ҡырҡып сығарыу **2.** *что* (*перекрыть*) ҡәртәләү, киҫеү, быуыу; **перере́зать путь неприя́телю** дошмандың юлын киҫеү **3.** *что* (*пересечь*) киҫеп үтеү; **отро́ги перере́зали равни́ну** тау тармаҡта-

ры тигеҙлекте киҫеп үткән **4.** *кого*; *разг.* (*зарезать всех, многих*) һуйып бөтөрөү; **перере́зать всех кур** бөтә тауыҡтарҙы һуйып бөтөрөү

**ПЕРЕРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **перере́зать**

**ПЕРЕРЕ́ЗАТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡырҡылып (киҫелеп) сығыу (өҙөлөү); **про́волока перере́залась** сым ҡырҡылып сыҡты **2.** *разг.* (*порезаться*) ҡырҡылып бөтөү **3.** *разг.* (*зарезаться — обо всех, многих*) һуйылып бөтөү

**ПЕРЕРЕЗА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перере́заться 2.** *страд. от* **перереза́ть**

**ПЕРЕРЕ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **перере́зать**

**ПЕРЕРЕ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перере́заться 2.** *страд. от* **перере́зывать**

**ПЕРЕРЕША́ТЬ** *несов. см.* **перереши́ть**

**ПЕРЕРЕШИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* яңынан (ҡабаттан) сығарыу, икенсе юл менән (башҡаса) сисеү (хәл итеү); **перереши́ть зада́чу** мәсьәләне икенсе юл менән сисеү

**ПЕРЕРЖА́ВЕТЬ** и **ПЕРЕРЖАВЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** тутығып бөтөү; **лопа́та перержа́вела** көрәк тутығып бөткән **2.** (*сломаться от ржавчины*) тутығып һыныу, тутығыуҙан өҙөлөп сығыу; **про́волока перержаве́ла** сым тутығыуҙан өҙөлгән

**ПЕРЕРИСОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*срисовать*) (рәсемде) күсереп төшөрөү (яһау) **2.** *что* (*нарисовать заново, иначе*) (рәсемде) яңынан төшөрөү (яһау, күсереп алыу, төшөрөп алыу) **3.** *кого-что* (*нарисовать всё, всех*) (һүрәткә) төшөрөп сығыу, төшөрөп ҡуйыу

**ПЕРЕРИСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **перерисова́ть**

**ПЕРЕРОДИ́ТЬ** *сов. кого-что* тамырынан үҙгәртеү, икенсе төрлөгә әйләндереү

**ПЕРЕРОДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тамырынан үҙгәреү, икенсе төрлөгә әйләнеү; **нра́вственно перероди́ться** әхлаҡ яғынан тамырынан үҙгәреү **2.** элекке сифатын юғалтыу, тоҡомо үҙгәреү; **поро́да скота́ перероди́лась** малдың тоҡомо үҙгәрҙе

**ПЕРЕРОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **переродить**

**ПЕРЕРОЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переро-ди́ться 2.** *страд. от* **перерожда́ть**

**ПЕРЕРОЖДЕ́НИЕ** *с см.* **переродиться — перерожда́ться** 1

**ПЕРЕРО́СТОК** *м* йәше уҙған (*бала, йәш үҫмер*); **учени́к-переро́сток** йәше уҙған уҡыусы

**ПЕРЕРУБА́ТЬ** *несов. см.* **перерубить**

**ПЕРЕРУБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* урталай (икегә) ҡырҡыу (сабыу, ҡырҡып (сабып) өҙөү); **переруби́ть кол** ҡаҙыҡты урталай ҡырҡыу **2.** *что*; *разг.* (*срубить всё, многое*) ҡырҡып (киҫеп) бөтөрөү **3.** *кого-что*; *разг.* (*убить саблей и т.п.*) сабып (турап) ташлау (бөтөрөү)

**ПЕРЕРУГА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* үҙ-ара әрләшеп (ызғышып, тиргәшеп) бөтөү

**ПЕРЕРУ́ГИВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* әрләшеү, ирәгәләшеү, ҡаршы әйтешеү, әрепләшеү, тиргәшеү

**ПЕРЕРЫ́В** *м* **1.** *разг.* (*место разрыва*) өҙөк, өҙөлгән урын (ер) **2.** тәнәфес, ял, туҡтап (туҡталып) тороу; **обе́денный переры́в** төшкө тәнәфес; **отдохну́ть во вре́мя переры́ва** тәнәфес ваҡытында ял итеү

**ПЕРЕРЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **перерва́ть**

**ПЕРЕРЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **переры́ть**

**ПЕРЕРЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **перерва́ться 2.** *страд. от* **перерыва́ть** I

**ПЕРЕРЫВА́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **перерыва́ть** II

**ПЕРЕРЫ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡаҙып сығыу (бөтөрөү); **переры́ть весь сад** бөтә баҡсаны ҡаҙып сығыу **2.** арҡыры(ға) ҡаҙып (соҡоп) сығыу; **переры́ть доро́гу кана́вой** юл арҡыры канау ҡаҙып сығыу **3.** *разг.* аҡтарыу, аҡтарып сығыу (бөтөү), аҫтын-өҫкә әйләндереү; **переры́ть все ве́щи** бөтә әйберҙең аҫтын-өҫкә әйләндереү

**ПЕРЕСАДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* күсереп ултыртыу; **пересади́ть ученика́ за другу́ю па́рту** уҡыусыны икенсе партаға күсереп ултыртыу; **пересади́ть огурцы́** ҡыяр күсереп ултыртыу; **пересади́ть по́чку** бөйөрҙө күсереп ултыртыу **2.** *что* (*насадить на что-л. другое*) ултыртыу, һаплау; **пересади́ть топо́р на друго́е топори́ще** балтаны икенсе һапҡа һаплау **3.** *кого-что*; *разг.* (аша) күтәреп сығарыу, сығарып ҡуйыу; **пересади́ть ребёнка че́рез забо́р** баланы ҡойма аша күтәреп сығарыу

**ПЕРЕСА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **пересади́ть — переса́живать** 1, 2; **произвести́ переса́дку пассажи́ров** юлсыларҙы күсереп ултыртыу; **переса́дка расте́ний** үҫемлектәрҙе күсереп ултыртыу; **переса́дка тка́ней и о́рганов** туҡымаларҙы һәм ағзаларҙы күсереп ултыртыу **2.** (*в пути*) төшөп (күсеп) ултырыу, пересадка; **е́хать без переса́док** күсеп ултырмай барыу

**ПЕРЕСА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **пересади́ть**

**ПЕРЕСА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пере-се́сть 2.** *страд. от* **переса́живать**

**ПЕРЕСА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **пересоли́ть**

**ПЕРЕСДАВА́ТЬ** *несов. см.* **пересда́ть**

**ПЕРЕСДА́ТЬ** *сов. что* **1.** яңынан (ҡабаттан) биреү; **пересда́ть арендо́ванную зе́млю** ҡуртымға алған ерҙе яңынан биреү **2.** *карт.* яңынан таратып (өләшеп) сығыу **3.** *разг.* яңынан (ҡабаттан) тапшырыу (биреү); **пересда́ть экза́мен по матема́тике** математиканан имтиханды ҡабаттан тапшырыу

**ПЕРЕСДА́ЧА** *ж см.* **пересда́ть — пересдава́ть**

**ПЕРЕСЕВА́ТЬ** *несов. см.* **пересе́ять**

**ПЕРЕСЕДЛА́ТЬ** *сов. кого* **1.** (*оседлать заново*) яңынан (ҡабаттан) эйәрләү; **переседла́ть коня́** атты ҡабаттан эйәрләү **2.** *разг.* (*оседлать всех, многих*) эйәрләп сығыу; **переседла́ть всех лошаде́й** бөтә аттарҙы ла эйәрләп сығыу

**ПЕРЕСЁДЛЫВАТЬ** *несов. см.* **переседла́ть**

**ПЕРЕСЕКА́ТЬ** *несов. см.* **пересе́чь**

**ПЕРЕСЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пересе́чься 2.** *страд. от* **пересека́ть**

**ПЕРЕСЕЛЕ́НЕЦ** *м* күсеп килгән кеше, килмешәк, күскенсе; **вы́нужденный переселе́нец** күсенергә мәжбүр кеше, мәжбүри күскенсе

**ПЕРЕСЕЛЕ́НИЕ** *с см.* **пересели́ть — переселя́ть, пересели́ться — переселя́ться**

**ПЕРЕСЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* күсереү, күсереп урынлаштырыу, яңы ергә күсереү

**ПЕРЕСЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* күсеү, күсеп сығыу (урынлашыу), яңы ергә күсеү

**ПЕРЕСЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **пересели́ть**

**ПЕРЕСЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пересели́ться 2.** *страд. от* **переселя́ть**

**ПЕРЕСЕ́СТЬ** *сов.* **1.** күсеп (барып, килеп) ултырыу; **пересе́сть побли́же к окну́** тәҙрәгә яҡын килеп ултырыу **2.** күсеп ултырыу, пересадка яһау; **пересе́сть на ско́рый по́езд** тиҙ йөрөшлө поезға күсеп ултырыу

**ПЕРЕСЕЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **пересе́чь — пересека́ть** 2—4, **пересе́чься — пересека́ться 2.** (*место*) сат, киҫешкән урын; **на пересече́нии доро́г** юлдар киҫешкән урында

**ПЕРЕСЕЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **пересе́чь 2.** *прил.* соҡорло-саҡырлы, тигеҙһеҙ; **пересечённая ме́стность** соҡорло-саҡырлы урын

**ПЕРЕСЕ́ЧЬ** *сов. что* **1.** *разг.* (*рассечь надвое*) киҫеп (сабып) төшөрөү **2.** арҡыры (аша) сығыу (үтеү), киҫеп үтеү **3.** (*перерезать*) киҫеп үтеү; **желе́зная доро́га пересечёт го́ру** тимер юл тауҙы киҫеп үтәсәк **4.** *кому-чему* (*преградить*) киҫеү, кәртәләү, арҡыры төшөү; **пересе́чь путь неприя́телю** дошмандың юлын киҫеү

**ПЕРЕСЕ́ЧЬСЯ** *сов.* киҫешеү, киҫешеп үтеү; **ли́нии пересеку́тся** һыҙыҡтар киҫешәсәк

**ПЕРЕСЕ́ЯТЬ** *сов. что* **1.** (*засеять повторно*) яңынан (ҡабаттан) сәсеү **2.** (*просеять повторно*) яңынан (ҡабаттан) иләү

**ПЕРЕСИДЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого* оҙағыраҡ ултырыу; **пересиде́ть всех госте́й** ҡунаҡтарҙың барыһынан да оҙағыраҡ ултырыу **2.** (*просидеть дольше, чем нужно*) оҙаҡ ултырып китеү (ташлау) **3.** *что* и *без. доп.* (*просидеть, пережидая*) ултырып тороу, көтөп ултырыу; **пересиде́ть до утра́** иртәнгә тиклем көтөп ултырыу

**ПЕРЕСИ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **пересиде́ть**

**ПЕРЕСИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **переси́лить**

**ПЕРЕСИ́ЛИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* еңеү, өҫтөн сығыу, еңеп сығыу **2.** *что* еңеү, баҫыу; **переси́лить сон** йоҡоно еңеү; **переси́лить страх** ҡурҡыуҙы еңеү

**ПЕРЕСИ́НИВАТЬ** *несов. см.* **пересини́ть**

**ПЕРЕСИНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*подсинить заново*) яңынан (ҡабаттан) синкеләү (синкәгә маныу) **2.** (*подсинить слишком сильно*) артыҡ (ныҡ) синкеләп ебәреү (ташлау); **пересини́ть бельё** керҙе ныҡ синкеләп ташлау **3.** *разг.* (*подсинить всё, многое*) синкеләп (синкәгә манып) бөтөрөү

**ПЕРЕСКА́З** *м см.* **пересказа́ть — переска́зывать**

**ПЕРЕСКАЗА́ТЬ** *сов. что* **1.** (үҙ һүҙҙәрең менән) һөйләп биреү (сығыу); **пересказа́ть содержа́ние произведе́ния** әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләп биреү **2.** *разг.* (*рассказать заново*) яңынан (ҡабаттан) һөйләү **3.** *разг.* (*рассказать всё, многое*) һөйләп бөтөрөү (биреү); **пересказа́ть все но́вости** бөтә яңылыҡты һөйләп биреү

**ПЕРЕСКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **пересказа́ть**

**ПЕРЕСКА́КИВАТЬ** *несов. см.* **перескочи́ть**

**ПЕРЕСКОЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, через что* (аша, арҡыры) һикереп сығыу; **перескочи́ть че́рез ров** соҡорҙо һикереп сығыу **2.** (*скачком переместиться куда-л.*) һикереү, һикереп менеү (төшөү); **перескочи́ть с ка́мня на ка́мень** таштан ташҡа һикереү **3.** *на что*; *разг.* һикереү, күсеү; **перескочи́ть с одно́й те́мы на другу́ю** бер теманан икенсеһенә күсеү

**ПЕРЕСЛАСТИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* артыҡ татлы итеп (шәрбәтләп) ебәреү; **пересласти́ть чай** сәйҙе артыҡ шәрбәтләп ебәреү

**ПЕРЕСЛА́ТЬ** *сов. что* ебәреү, һалып ебәреү; **пересла́ть де́ньги по по́чте** почта менән аҡса ебәреү

**ПЕРЕСЛА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **пересласти́ть**

**ПЕРЕСМА́ТРИВАТЬ** *несов. см.* **пересмотре́ть**

**ПЕРЕСМА́ТРИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **пересма́тривать**

**ПЕРЕСМЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* көлөшөү, бер-берең҇е мәрәкәләү, мәрәкәләшеү

**ПЕРЕСМЕ́ШНИК** *м* и **ПЕРЕСМЕ́ШНИЦА** *ж*; *разг.* кешенән көлөүсе, кешенән көлөргә яратыусы, мәрәкәсел

**ПЕРЕСМО́ТР** *м см.* **пересмотре́ть — пересма́тривать**

**ПЕРЕСМОТРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* яңынан (ҡайтанан) ҡарап сығыу; **пересмотре́ть все кни́ги** китаптарҙың барыһын да яңынан ҡарап сығыу **2.** *кого-что*; *разг.* (*всё, многое, всех, многих*) ҡарап сығыу (бөтөрөү); **пересмотре́ть все спекта́кли теа́тра** театрҙың барлыҡ спектаклдәрен ҡарап сығыу **3.** *что* (*обсудить заново*) яңынан (ҡабаттан) ҡарау (тикшереү); **пересмотре́ть вопро́с** мәсьәләне ҡабаттан тикшереү

**ПЕРЕСНИМА́ТЬ** *несов. см.* **пересня́ть**

**ПЕРЕСНИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пересня́ться 2.** *страд. от* **переснима́ть**

**ПЕРЕСНЯ́ТЬ** *сов. кого-что* яңынан (ҡабаттан, киренән) төшөрөү (төшөрөп алыу); **пересня́ть фильм** фильмды ҡабаттан төшөрөп алыу

**ПЕРЕСНЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (фотоға) яңынан (ҡабаттан) төшөү

**ПЕРЕСО́Л** *м* артыҡ (үтә) тоҙло булыу; **капу́ста с пересо́лом** кәбеҫтә үтә тоҙло

**ПЕРЕСОЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* артыҡ (үтә) тоҙло итеү, тоҙҙо күп һалыу; **пересоли́ть суп** ашты ар-

тыҡ тоҙло итеү **2.** *что* и *без доп.*; *перен.*, *разг.* (*переборщить*) арттырып (аштырып) ебәреү, артығын ҡыланыу

**ПЕРЕСОРТИРОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*рассортировать заново*) яңынан (ҡабаттан) сортҡа айырыу; **пересортирова́ть помидо́ры** помидорҙарҙы яңынан сортҡа айырыу **2.** (*рассортировать всё, многое*) сортҡа айырып сығыу

**ПЕРЕСОРТИРО́ВКА** *ж см.* **пересортирова́ть** — **пересортиро́вывать**; **пересортиро́вка я́блок** алмаларҙы сортҡа айырып сығыу

**ПЕРЕСОРТИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **пересортирова́ть**

**ПЕРЕСОСТА́ВИТЬ** *сов. что* яңынан (ҡабаттан) төҙөү (яҙыу) (*китапты, докладты һ.б.*)

**ПЕРЕСОСТАВЛЕ́НИЕ** *с см.* **пересоста́вить** — **пересоставля́ть**

**ПЕРЕСОСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **пересоста́вить**

**ПЕРЕСО́ХНУТЬ** *сов.* **1.** артыҡ ныҡ (ныҡ) кибеү, кибеп ҡатып бөтөү, кибеп ҡатыу; **по́чва пересо́хла** тупраҡ ныҡ кипкән; **хлеб пересо́х** икмәк кибеп ҡатҡан **2.** (*иссякнуть — об источнике, водоёме и т.п.*) ҡороу, кибеү; **ре́чка пересо́хла** инеш ҡороған

**ПЕРЕСПА́ТЬ** *сов.* **1.** артыҡ (оҙаҡ) йоҡлау **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* йоҡлап уҙғарып (үткәреп) ебәреү; **переспа́ть жару́** эҫене йоҡлап үткәреү **3.** (*переночевать*) йоҡлап (ҡунып) сығыу, төн үткәреү

**ПЕРЕСПЕВА́ТЬ** *несов. см.* **переспе́ть**

**ПЕРЕСПЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое ныҡ (үтә) бешкән (өлгөргән) (*емеш-еләккә ҡарата*)

**ПЕРЕСПЕ́ТЬ** *сов.* ныҡ (үтә) бешеү (өлгөрөү); **ды́ня переспе́ла** ҡауын ныҡ бешкән

**ПЕРЕСПО́РИТЬ** *сов. кого* бәхәсләшеп еңеү; **его́ не переспо́ришь** уны бәхәсләшеп еңә алмаҫһың

**ПЕРЕСПРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **переспроси́ть**

**ПЕРЕСПРОСИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* ҡабатлап һорау; **переспроси́ть после́дние слова́** һуңғы һүҙҙәрҙе ҡабатлап һорау **2.** *кого-что*; *разг.* (*опросить всех, многих, обо всём, многом*) һорашып (һорап) сығыу

**ПЕРЕССО́РИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* талаштырып (ыҙғыштырып) бөтөү

**ПЕРЕССО́РИТЬСЯ** *сов.* талашып (ыҙғышып) бөтөү

**ПЕРЕСТАВА́ТЬ** *несов. см.* **переста́ть**

**ПЕРЕСТА́ВИТЬ** *сов. кого-что* күсереп ҡуйыу, икенсе урынға ҡуйыу, урынын алмаштырып ҡуйыу; **переста́вить стол** өҫтәлде күсереп ҡуйыу; **переста́вить слова́ в предложе́нии** һөйләмдә һүҙҙәрҙең урындарын алмаштырып ҡуйыу

**ПЕРЕСТАВЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **переста́вить** **2.** *что* (*в сочетании со словом "ноги"*) һөйрәп барыу; **е́ле переставля́ет но́ги** аяғын саҡ һөйрәп бара

**ПЕРЕСТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **перестоя́ть**

**ПЕРЕСТАНО́ВКА** *ж* күсереп ҡуйыу, икенсе урынға ҡуйыу, урынын алмаштырыу; **перестано́вка ме́бели** мебель күсереп ҡуйыу; **перестано́вка слов в предложе́нии** һөйләмдә һүҙҙәрҙең урындарын алмаштырыу

**ПЕРЕСТАРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* артыҡ тырышыу, кәрәгенән тыш тырышыу

**ПЕРЕСТА́РОК** *м*; *разг.* йәше уҙған (сыҡҡан) кеше

**ПЕРЕСТА́ТЬ** *сов.* **1.** *с неопр.* туҡтау, ташлау; **переста́ть петь** йырлауҙан туҡтау **2.** *с неопр.* и *без доп.* (*прекратиться — об осадках*) туҡтау, тымыу

**ПЕРЕСТЁГИВАТЬ** *несов. см.* **перестегну́ть**

**ПЕРЕСТЕГНУ́ТЬ** *сов.* яңынан (ҡайтанан) ҡаптырыу; **перестегну́ть пря́жку** таралғыны кирәнән ҡаптырыу; **перестегну́ть пу́говицы** төймәләрҙе ҡаптырыу

**ПЕРЕСТЕЛИ́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **перестла́ть**

**ПЕРЕСТИЛА́ТЬ** *несов. см.* **перестла́ть**

**ПЕРЕСТИРА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*выстирать заново*) яңынан (киренән) йыуыу **2.** *разг.* (*выстирать всё, многое*) йыуып бөтөрөү

**ПЕРЕСТИ́РЫВАТЬ** *несов. см.* **перестира́ть**

**ПЕРЕСТЛА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*постлать заново*) яңынан йәйеү (түшәү); **перестла́ть посте́ль** түшәкте яңынан йәйеү **2.** (*настлать заново, иначе*) яңынан (ҡабаттан, башҡаса) түшәү; **перестла́ть парке́т** паркетты ҡабаттан түшәү

**ПЕРЕСТОЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.*; *разг.* (үткәнен, бөткәнен) көтөү (көтөп тороу), (үткәнсе, бөткәнсе) көтөп тороу; **перестоя́ть непого́ду** йонсоу көндәр үткәнен көтөү **2.** (*простояв в каком-л. состоянии дольше, чем нужно, измениться качественно*) оҙаҡ тороп (ултырып) боҙолоу; **кефи́р перестоя́л** кефир оҙаҡ ултырып боҙолған

**ПЕРЕСТРАДА́ТЬ** *сов. что* күп ғазап (яфа) сигеү, күпте күреү (кисереү)

**ПЕРЕСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **перестро́ить**

**ПЕРЕСТРА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перестро́иться** **2.** *страд. от* **перестра́ивать**

**ПЕРЕСТРАХОВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** яңынан (ҡабаттан) страховкалау; **перестрахова́ть своё иму́щество** үҙ мөлкәтеңде страховкалау **2.** *разг.* (*застраховать всё, многое*) страховкалап бөтөү (сығыу)

**ПЕРЕСТРАХОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** яңынан (ҡабаттан) страховкаланыу **2.** *разг.* яуаплылыкты үҙ өҫтөңдән төшөрөргә тырышыу

**ПЕРЕСТРАХО́ВКА** *ж см.* **перестрахова́ть** — **перестрахо́вывать**, **перестрахова́ться** — **перестрахо́вываться**

**ПЕРЕСТРАХО́ВЩИК** *м*; *разг.* яуаплылыкты үҙенән төшөрөргә тырышыусы

**ПЕРЕСТРАХО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **перестрахова́ть**

**ПЕРЕСТРАХО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перестрахова́ться 2.** *страд. от* **перестрахо́вывать**

**ПЕРЕСТРЕ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* атышыу

**ПЕРЕСТРЕ́ЛКА** *ж* атыш; **руже́йная пересте́лка** мылтыҡтан атыш, мылтыҡ атышы

**ПЕРЕСТРЕЛЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*застрелить всех, многих*) атып бөтөрөү, атып үлтереп бөтөрөү; **перестреля́ть всю дичь** барлыҡ кейекҡошто атып бөтөрөү **2.** *что*; *разг.* (*израсходовать стрельбой*) атып бөтөрөү, атыуға тотоп бөтөрөү; **перестреля́ть все патро́ны** бөтә патронды атып бөтөрөү

**ПЕРЕСТРО́ИТЬ** *сов.* **1.** *что* яңынан (башҡаса, үҙгәртеп) төҙөү (ҡороу, һалыу); **перестро́ить дом** өйҙө яңынан һалыу **2.** *что* үҙгәртеү, үҙгәртеп ҡороу (төҙөү); **перестро́ить програ́мму** программаны үҙгәртеү; **перестро́ить эконо́мику страны́** илдең иҡтисадын үҙгәртеп ҡороу **3.** *кого-что* яңынан (башҡаса) теҙеү; **перестро́ить ро́ту** ротаны башҡаса теҙеү **4.** *что* башҡаса (икенсе төрлө) көйләү; **перестро́ить роя́ль** роялде икенсе төрлө көйләү **5.** *что* башҡа (икенсе һ.б.) тулҡынға көйләү; **перестро́ить приёмник на коро́ткие во́лны** радиоалғысты ҡыҫҡа тулҡындарға көйләү

**ПЕРЕСТРО́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** яңынан (икенсе төрлө) теҙелеү; **ро́та бы́стро перестро́илась** рота тиҙ генә яңынан теҙелде **2.** башҡаса эшләй башлау, эш тәртибен үҙгәртеү

**ПЕРЕСТРО́ЙКА** *ж см.* **перестро́ить — перестра́ивать, перестро́иться — перестра́иваться**; **перестро́йка зда́ния** бинаны яңынан төҙөү; **перестро́йка наро́дного хозя́йства** халыҡ хужалығын үҙгәртеп ҡороу

**ПЕРЕСТУ́КИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** (*издавать звук, ударяя друг о друга*) тыҡылдашыу, тыҡтыҡ килеү **2.** *с кем* и *без доп.* (*обмениваться условными стуками*) туҡылдатып хәбәрләшеү

**ПЕРЕСТУПА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **переступи́ть 2.** атлау, атлап барыу; **е́ле переступа́ть нога́ми** көскә атлап барыу

**ПЕРЕСТУПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, через что* аша атлау, аша атлап сығыу; **переступи́ть поро́г** тупһа аша атлау **2.** *что* и *без доп.*; *перен.* сигенән сығыу, арттырып ебәреү; **переступи́ть грани́цы прили́чия** әҙәп сиктәренән сығыу

**ПЕРЕСУ́Д** *м* **1.** *разг.* яңынан суд; **пода́ть на пересу́д** яңынан судҡа биреү **2.** *только мн.* **пересу́ды**; *разг.* ғәйбәт, имеш-мимеш, юҡ-бар һүҙ

**ПЕРЕСУ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **пересуши́ть**

**ПЕРЕСУ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пересуши́ться 2.** *страд. от* **пересу́шивать**

**ПЕРЕСУШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*просушить заново*) яңынан (ҡабаттан) киптереү **2.** (*высушить больше, чем нужно*) үтә (артыҡ) ныҡ киптереү; **пересуши́ть сухари́** шөкәрәне артыҡ ныҡ киптереү **3.** *разг.* (*высушить всё*) киптереп бөтөү; **пересуши́ть всё зерно́** барлыҡ ашлыҡты киптереп бөтөү

**ПЕРЕСУШИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** артыҡ (ныҡ) кибеү, кибеп китеү; **се́но пересуши́лось** бесән кибеп киткән **2.** *разг.* (*высушиться — обо всём*) кибеп бөтөү

**ПЕРЕСЧИТА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*сосчитать*) һанап (иҫәпләп) сығыу **2.** *кого-что* (*сосчитать заново*) яңынан (ҡабаттан) һанау (иҫәпләү); **пересчита́ть кни́ги** китаптарҙы ҡабат һанау **3.** *что* (*выразить в других единицах*) күсереп иҫәпләү

**ПЕРЕСЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **пересчита́ть**

**ПЕРЕСЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **пересла́ть**

**ПЕРЕСЫ́ЛКА** *ж см.* **пересла́ть — пересыла́ть**

**ПЕРЕСЫ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое оҙатыу ...ы, күсереү ...ы; **пересы́льный пу́нкт** оҙатыу пункты

**ПЕРЕСЫ́ПАТЬ** *сов. что* **1.** һалыу, тултырыу, бушатыу (*икенсе урынға*); **пересы́пать соль в мешо́к** тоҙҙо тоҡҡа бушатыу **2.** (*обсыпать чем-л.*) (араларына) һибеү, һибеп (һалып) сығыу; **пересы́пать шу́бу нафтали́ном** тунға нафталин һибеү **3.** *перен.* (күп) ҡыҫтырып (ҡатнаштырып) һөйләү; **пересы́пать речь посло́вицами** мәҡәлдәр ҡыҫтырып һөйләү

**ПЕРЕСЫПА́ТЬ I** *несов. см.* **пересы́пать**

**ПЕРЕСЫПА́ТЬ II** *несов. см.* **переспа́ть** 1, 2

**ПЕРЕСЫХА́НИЕ** *с см.* **пересыха́ть**; **пересыха́ние водоёма** һыу ятҡылығының ҡороуы

**ПЕРЕСЫХА́ТЬ** *несов. см.* **пересо́хнуть**

**ПЕРЕТА́ПЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перетопи́ться 2.** *страд. от* **перета́пливать**

**ПЕРЕТАСКА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** ташып бөтөрөү; **перетаска́ть дрова́ в избу́** утынды өйгә ташып бөтөрөү **2.** (*постепенно выкрасть*) үҙенә ташыу (ташып бөтөрөү)

**ПЕРЕТА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **перетащи́ть**

**ПЕРЕТАСОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что*; *карт.* бутау, аралаштырыу **2.** *кого-что*; *перен., разг.* болғатып (аралаштырып, күсереп) бөтөрөү; **перетасова́ть бума́ги в столе́** өҫтәл эсендәге ҡағыҙҙы аралаштырып бөтөрөү

**ПЕРЕТАСО́ВКА** *ж см.* **перетасова́ть — перетасо́вывать**

**ПЕРЕТАСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **перетасова́ть**

**ПЕРЕТАЩИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** күсереү, алып сығыу, һөйрәп (тартып) күсереү (аша сығарыу, алып сығыу); **перетащи́ть шкаф в другу́ю ко́мнату** шкафты икенсе бүлмәгә алып сығыу **2.** *перен., разг.* тартыу, алыу; **перетащи́ть хоро́ших игроко́в в свою́ кома́нду** яҡшы уйынсыларҙы үҙ командаңа тартыу

**ПЕРЕТЕКА́ТЬ** *несов. см.* **перете́чь**

**ПЕРЕТЕРЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** ышҡып (ҡырып) өҙөү; **перетере́ть верёвку** бауҙы ышҡып өҙөү **2.** ҡырып (ыуып) бөтөрөү; **перетере́ть я́блоко на тёрке** алманы ҡырғыс менән ҡырып бөтөрөү **3.** *разг.* һөртөп сығыу (бөтөрөү); **перетере́ть о́кна** тәҙрәләрҙе һөртөп сығыу

**ПЕРЕТЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* ышҡылып (ҡырылып, ашалып) өҙөлөү; **верёвка перетёрлась** бау ышҡылып өҙөлгән

**ПЕРЕТЕРПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* күпте күреү (кисереү); **перетерпе́ть мно́го го́ря** бик күп ҡайғы кисереү **2.** *что* и *без доп.* түҙеү, сыҙау; **перетерпе́ть боль** ауыртыуға түҙеү

**ПЕРЕТЕ́ЧЬ** *сов.* ағып сығыу (бөтөү) (*бер урындан икенсе урынға*)

**ПЕРЕТИРА́ТЬ** *несов. см.* **перетере́ть**

**ПЕРЕТИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перетере́ться** **2.** *страд. от* **перетира́ть**

**ПЕРЕТО́ЛКИ** *только мн.*; *разг.* ғәйбәт, юҡбар һүҙ

**ПЕРЕТОЛКОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* яңылыш (боҙоп, икенсе төрлө) аңлатыу (һөйләү); **перетолкова́ть слова́** *чьи-л. берәйһенең* һүҙҙәрен боҙоп аңлатыу **2.** *о ком-чём* и *без доп.*; *разг.* һөйләшеп (гәпләшеп) алыу; **нам с тобо́й ну́жно о мно́гом перетолкова́ть** беҙгә һинең менән күп нәмә тураһында һөйләшеп алырға кәрәк

**ПЕРЕТОЛКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **перетолкова́ть**

**ПЕРЕТОЛО́ЧЬ** *сов. что* төйөп (онтап) бөтөү; **перетоло́чь сухари́** шөкәрәне төйөп бөтөү

**ПЕРЕТОПИ́ТЬ I** *сов. что* **1.** (*истопить всё, многое*) *разг.* яғыу, яғып сығыу; **перетопи́ть все пе́чи** мейестәрҙең барыһын да яғып сығыу **2.** *прост.* (*израсходовать на топку всё*) яғып бөтөү; **перетопи́ть все дрова́** барлыҡ утынды яғып бөтөү

**ПЕРЕТОПИ́ТЬ II** *сов. что* (*растопить*) иретеү, һыҙғыртыу, һыҙҙырыу; **перетопи́ть ма́сло** май иретеү

**ПЕРЕТОПИ́ТЬ III** *сов. кого-что*; *разг.* (*утопить, потопить всё, многое*) (һыуға) батырып бөтөү

**ПЕРЕТОПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** иреү һыҙғыртылыу, һыҙҙырылыу; **ма́сло перетопи́лось** май ирегән **2.** *разг.* (*целиком или о многом*) иреп (һыҙып) бөтөү

**ПЕРЕТОПТА́ТЬ** *сов. кого-что* тапап (иҙеп) бөтөү; **перетопта́ть траву́** үләнде тапап бөтөү

**ПЕРЕТОЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*наточить заново*) яңынан ҡайрау (сарлау, үткерләү) **2.** (*наточить всё*) ҡайрап (сарлап, үткерләп) ҡуйыу (сығыу); **переточи́ть ножи́** бысаҡтарҙы үткерләп сығыу

**ПЕРЕТРАВИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*отравить всех, многих*) ағыулап ҡырып (үлтереп) бөтөрөү **2.** (*охотясь, затравить всех, многих*) аулап (тотоп) бөтөрөү (ҡырыу); **перетрави́ть волко́в** бүреләрҙе аулап ҡырыу

**ПЕРЕТРЕВО́ЖИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ныҡ хафаландырыу (ҡуҙғытыу, борсоу, тынысһыҙлау); **перетрево́жить пчёл в у́лье** умарталағы ҡорттарҙы ныҡ ҡуҙғытыу

**ПЕРЕТРЕВО́ЖИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ныҡ хафаланыу (борсолоу, тынысһыҙланыу)

**ПЕРЕТРЕ́СКАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* сатнау, сатнап (ярылып) бөтөү

**ПЕРЕТРО́ГАТЬ** *сов. кого-что* тотҡолап сығыу (ҡарау); **перетро́гать все ве́щи** әйберҙәрҙең барыһын да тотҡолап ҡарау

**ПЕРЕТРУ́СИТЬ** *сов.*; *разг.* ныҡ ҡурҡыу, ҡаты шөрләү

**ПЕРЕТРУСИ́ТЬ** *сов.*; *прост.* ҡағып-һуғып әйләндереү, ҡаҡҡылау; **перетруси́ть соло́му** һаламды ҡаҡҡылау

**ПЕРЕТРЯСА́ТЬ** *несов. см.* **перетрясти́**

**ПЕРЕТРЯ́СКА** *ж*; *разг. см.* **перетрясти́ — перетряса́ть**

**ПЕРЕТРЯСТИ́** *сов. что*; *разг.* **1.** (*вытрясти, очищая*) ҡаҡҡылап (һелккеләп, ҡағып) сығыу; **перетрясти́ ковры́** келәмдәрҙе ҡағып сығыу **2.** аҡтарып бөтөү (сығыу); **перетрясти́ все бума́ги** бөтә ҡағыҙҙарҙы аҡтарып сығыу

**ПЕРЕТРЯ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **перетряхну́ть**

**ПЕРЕТРЯХНУ́ТЬ** *сов. что* ҡаҡҡылау, һелккеләү (*таҙартыу, ҡабартыу һ.б. өсөн*); **перетряхну́ть оде́жду** өҫ кейемен ҡаҡҡылау

**ПЕРЕ́ТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** (*идти*) барыу, һалдырыу, йүгереү; **пере́ть по гря́зи** бысраҡ ярып йүгереү **2.** (*ломиться*) төрткөләп (этешә-төртөшә, тоноп, баҫып) килеү (барыу); **прёт сквозь толпу́** халыҡ араһынан этешә-төртөшә бара **3.** *что* (*тащить что-л. громоздкое*) күтәреп (һөйрәп) алып барыу **4.** *что* и *без доп.* (*красть, воровать*) сәлдереү

**ПЕРЕТЯ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **перетяну́ть**

**ПЕРЕТЯ́ГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **перетяну́ться** **2.** *страд. от* **перетя́гивать**

**ПЕРЕТЯ́ЖКА** *ж см.* **перетяну́ть** 1, 3–6, 8

**ПЕРЕТЯНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һөйрәтеп килтереү (күсереү); **перетяну́ть ба́ржи в зато́н** баржаларҙы ҡултыҡҡа һөйрәтеп килтереү **2.** *кого*; *перен.*, *разг.* (*переманить*) үҙ яғына тартыу (күсереү), үҙ янына алыу (килтереү) **3.** *что*; *полигр.* күсереү (*наборҙың бер өлөшөн икенсе яҡҡа сығарыу*) **4.** *что* тартып (ҡыҫып) бәйләү (быуыу); **перетяну́ть та́лию** билде ҡыҫып бәйләү **5.** *что* (*затянуть заново*, *иначе*) яңынан тартыу (тарттырыу); **перетяну́ть подпру́ги у седла́** эйәрҙең айылын яңынан тартыу **6.** *что* артыҡ (үтә) ныҡ тарттырыу; **перетяну́ть струну́** ҡылды артыҡ ныҡ тарттырыу **7.** *что* и *без доп.* (*превзойти в весе*) баҫа төшөү, ауырыраҡ тартыу; **ле́вая ча́ша весо́в перетяну́ла** үлсәүҙең һул тәрилкәһе баҫа төшкән **8.** *что* и *без доп.*; *разг.*

(*оказаться сильнее*) тартышып еңеү; **кто кого́ перетя́нет** кем кемдә тартышып еңер

**ПЕРЕТЯНУ́ТЬСЯ** *сов.* ҡыҫып (тартып) бәйләү (быуыу); **перетяну́ться по́ясом** билбауҙы ҡыҫып быуыу

**ПЕРЕУБЕДИ́ТЬ** *сов. кого* дүндереү, кире күндереү, фекеренән (уйынан) баш тарттырыу; **его́ не переубеди́шь** уны дүндерә алмаҫһың

**ПЕРЕУБЕДИ́ТЬСЯ** *сов.* фекерендә (ҡарашынды) үҙгәртеү

**ПЕРЕУБЕЖДА́ТЬ** *несов. см.* **переубеди́ть**

**ПЕРЕУБЕЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переубеди́ться 2.** *страд. от* **переубежда́ть**

**ПЕРЕУ́ЛОК** *м* тыҡрыҡ

**ПЕРЕУСЕ́РДСТВОВАТЬ** *сов.*; *разг.* артыҡ (саманан тыш) тырышыу

**ПЕРЕУСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **переустро́ить**

**ПЕРЕУСТРО́ИТЬ** *сов. что* үҙгәртеп ҡороу (төҙөү), яңынан төҙөү

**ПЕРЕУСТРО́ЙСТВО** *с см.* **переустро́ить** — **переустра́ивать**

**ПЕРЕУТОМИ́ТЬ** *сов. кого-что* артыҡ (үтә) арытыу, хәлһеҙләндереү, талсыҡтырыу

**ПЕРЕУТОМИ́ТЬСЯ** *сов.* артыҡ (үтә) арыу, талсығыу

**ПЕРЕУТОМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **переутоми́ть**

**ПЕРЕУТОМЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переутоми́ться 2.** *страд. от* **переутомля́ть**

**ПЕРЕУЧЕ́СТЬ** *сов. кого-что* яңынан (ҡабаттан) иҫәпләү (иҫәпкә алыу); **переуче́сть оста́вшийся това́р** ҡалған тауарҙы яңынан иҫәпкә алыу

**ПЕРЕУЧЁТ** *м см.* **переуче́сть** — **переучи́тывать**; **переучёт скота́** малды яңынан иҫәпләү

**ПЕРЕУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **переучи́ть**

**ПЕРЕУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переучи́ться 2.** *страд. от* **переу́чивать**

**ПЕРЕУЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **переуче́сть**

**ПЕРЕУЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* (*обучить заново, чему-л. иному*) яңынан уҡытыу (өйрәтеү) **2.** *что* (*выучить снова*) яңынан (ҡабаттан) уҡыу (өйрәнеү), ҡабатлау; **переучи́ть уро́к** дәресте ҡабаттан уҡыу **3.** *кого* (*обучить всех, многих*) уҡытып (өйрәтеп) сығарыу

**ПЕРЕУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*обучиться заново*) яңынан (ҡабаттан) уҡыу (өйрәнеү) **2.** *разг.* артыҡ күп көс түгеп уҡып, үҙенә зыян килтереү

**ПЕРЕФОРМИРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* яңынан (үҙгәртеп) формалаштырыу

**ПЕРЕФОРМИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* яңынан (үҙгәреп) формалашыу

**ПЕРЕФОРМИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **переформирова́ть**

**ПЕРЕФОРМИРО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переформирова́ться 2.** *страд. от* **переформиро́вывать**

**ПЕРЕФРАЗИ́РОВАНИЕ** *с см.* **перефрази́ровать**

**ПЕРЕФРАЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* үҙгәртеп әйтеү (һөйләү); **перефрази́ровать афори́зм** афоризмды үҙгәртеп әйтеү

**ПЕРЕФРАЗИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **перефрази́ровать 2.** (*то, что перефразировано*) үҙгәртелгән һүҙ

**ПЕРЕХВА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **перехвали́ть**

**ПЕРЕХВАЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** артыҡ маҡтау, күп маҡтап ташлау **2.** *разг.* (*всех, многих*) маҡтап сығыу, барыһын да (бөтәһен дә) маҡтау

**ПЕРЕХВА́Т** *м* **1.** *см.* **перехвати́ть** 1—5, 7, 9, 10; **2.** (*место*) билтәк (билләнеп торған) урын

**ПЕРЕХВАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* эләктереп (тотоп) алыу (*китеп, осоп барғанда, юлда*); **перехвати́ть мяч** тупты һауала тотоп (эләктереп) алыу **2.** *что* (*захватить что-л.*) эләктереү, ҡулға төшөрөү; **перехвати́ть письмо́** кеше хатын эләктереү (ҡулға төшөрөү) **3.** (*схватить другой рукой*) тотоу, тотоп алыу **4.** *что* (*перевязать, перетянуть*) ҡыҫып (быуып) бәйләү **5.** *что* тынды ҡыҫыу, ҡыҫып (быуып) алыу, быуып тороу, тын ҡыҫылыу (ҡурылыу); **дыха́ние перехвати́ло** *безл.* тын ҡыҫылды **6.** *что, чего* и *без доп.*; *разг.* ҡапҡылап алыу, тамаҡ ялғап алыу **7.** *что, чего* и *без доп*; *разг.* бурысҡа (көтәсәккә, үтескә) алып тороу; **перехвати́ть сто рубле́й** йөҙ һум бурысҡа алып тороу **8.** *без доп.*; *разг.* (*переборщить*) арттырып (аштырып) ебәреү **9.** *что*; *перен.* үҙ ҡулыңа алыу (төшөрөү); **перехвати́ть инициати́ву** инициативаны үҙ ҡулыңа алыу **10.** *что*; *перен.* (*уловить взгляд, слова и т.п.*) тотоп алыу

**ПЕРЕХВА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **перехвати́ть**

**ПЕРЕХВОРА́ТЬ** *сов. чем* и *без доп.*; *разг.* **1.** (*переболеть — обо всех, многих*) ауырып (ауырышып) алыу, сирләп сығыу, ауырып үткәреү; **вся семья́ перехвора́ла** бөтә ғаилә ауырып алды **2.** (күп сир менән) ауырыу

**ПЕРЕХИТРИ́ТЬ** *сов. кого-что* хәйләлә уҙҙырып ебәреү, хәйләлерәк булып сығыу

**ПЕРЕХЛЕСТНУ́ТЬ** *сов. кого-что, через кого-что* (аша) сайпылып (сәсрәп, һуғылып) инеү; **волна́ перехлестну́ла че́рез борт ло́дки** тулҡын кәмә борты аша сайпылып инде

**ПЕРЕХЛЁСТЫВАТЬ** *несов. см.* **перехлестну́ть**

**ПЕРЕХО́Д** *м* **1.** *см.* **перейти́** 1—4; **перехо́д че́рез грани́цу** сик аша сығыу; **перехо́д коли́чества в ка́чество** һандың сифатҡа күсеүе **2.** (*место*) үткәүел, аша сығыу юлы; **подзе́мный перехо́д** ер аҫты үткәүеле **3.** (*коридор, галерея и т.п.*) аралыҡ **4.** (*расстояние, которое можно пройти за день*) көнлөк ара (юл)

**ПЕРЕХОДИ́ТЬ I** *несов. см.* **перейти́**

**ПЕРЕХОДИ́ТЬ II** *сов.*; *разг.* икенсе төрлө йөрөү, йөрөштө үҙгәртеү (*шахмат, шашка һ.б. уйында*)

**ПЕРЕХО́ДНЫЙ** и *разг.* **ПЕРЕХОДНО́Й,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* күсеү ...ы, күсереү ...ы; **переходно́й экза́мен** күсереү имтиханы; **перехо́дный пери́од** күсеү дәүере **2.** *грам.* күсемле; **перехо́дные глаго́лы** күсемле ҡылымдар ♦ **перехо́дный во́зраст** үҫмер саҡ, күсеү осоро (йәше)

**ПЕРЕХОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **переходи́ть** I; **2.** *прил.* күсмә; **переходя́щий ку́бок** күсмә кубок **3.** *прил.*; *фин.* күсерелә (күсә) торған; **переходя́щие су́ммы** күсә торған суммалар

**ПЕ́РЕЦ** *м* борос; **кра́сный пе́рец** ҡыҙыл борос; **чёрный пе́рец** ҡара борос ♦ **зада́ть пе́рцу** кәрәген биреү

**ПЕРЕЦЕДИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*процедить заново*) яңынан (икенсегә) һөҙөү **2.** (*цедя, перелить*) һөҙөп һалыу **3.** (*процедить всё, многое*) һөҙөп ҡуйыу (бөтөрөү); **перецеди́ть молоко́** һөт һөҙөп бөтөрөү

**ПЕРЕЦЕ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **перецеди́ть**

**ПЕРЕЦЕЛОВА́ТЬ** *сов. кого-что* үбеп сығыу (*барыһын да йәки күбеһен*)

**ПЕРЕЦЕЛОВА́ТЬСЯ** *сов.* үбешеү, үбешеп сығыу

**ПЕРЕЧЕКА́НИВАТЬ** *несов. см.* **перечека́нить**

**ПЕРЕЧЕКА́НИТЬ** *сов. что* **1.** (*отчеканить заново, по-иному*) яңынан һуғыу, ҡабат яһау **2.** (*отчеканить всё, многое*) һуғып (сүкеп яһап) бөтөү

**ПЕРЕЧЕКА́НКА** *ж см.* **перечека́нить — перечека́нивать**

**ПЕ́РЕЧЕНЬ** *м* теҙмә, исемлек; **пе́речень книг** китаптар исемлеге

**ПЕРЕЧЕРКА́ТЬ** и **ПЕРЕЧЁРКАТЬ** *сов. что*; *разг.* төҙәтеп (һыҙып, һыҙғылап) бөтөү

**ПЕРЕЧЁРКИВАНИЕ** *с см.* **перечёркивать**

**ПЕРЕЧЁРКИВАТЬ** *несов. см.* **перечеркну́ть**

**ПЕРЕЧЕРКНУ́ТЬ** *сов. что* һыҙып ташлау; **перечеркну́ть страни́цу** битте һыҙып ташлау

**ПЕРЕЧЕРТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*начертить заново*) яңынан (ҡабат) һыҙыу; **перечерти́ть план зда́ния** бинаның планын ҡабат һыҙыу **2.** (*снять копию чертежа*) күсереп һыҙыу, күсермәһен алыу; **перечерти́ть план на ка́льку** калькаға пландың күсермәһен алыу **3.** *разг.* (*начертить всё, многое*) һыҙып бөтөрөү (сығыу)

**ПЕРЕЧЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **перечерти́ть**

**ПЕРЕЧЕСА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*причесать заново*) яңынан (ҡабат) тарау **2.** (*всех, многих*) тарап сығыу (бөтөү, ҡуйыу)

**ПЕРЕЧЕСА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* яңынан тарау (*сәсте*)

**ПЕРЕЧЕ́СТЬ I** *сов. см.* **пересчита́ть**

**ПЕРЕЧЕ́СТЬ II** *сов. см.* **перечита́ть**

**ПЕРЕЧЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **перечеса́ть**

**ПЕРЕЧИНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*починить всё, многое*) ямап сығыу (бөтөү); **перечини́ть бельё** эске кейемде ямап бөтөү **2.** (*починить заново, иначе*) яңынан (ҡабаттан) ослау; **перечини́ть каранда́ш** ҡәләмде ҡабаттан ослау

**ПЕРЕЧИСЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **перечи́слить — перечисля́ть 2.** *бухг.* күсерелгән аҡса

**ПЕРЕЧИ́СЛИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (исемләп) һанап сығыу; **перечи́слить отсу́тствующих** килмәгәндәрҙе һанап сығыу **2.** *кого-что* күсереү, сығарыу; **перечи́слить в запа́с** запасҡа күсереү **3.** *что*; *бухг.* күсереү; **перечи́слить де́ньги на теку́щий счёт** аҡсаны ағымдағы счётҡа күсереү

**ПЕРЕЧИСЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **перечи́слить**

**ПЕРЕЧИ́СТИТЬ** *сов. что* **1.** (*вычистить всё, многое*) таҙартып ҡуйыу (бөтөү, сығыу) **2.** (*вычистить заново*) яңынан (киренән) таҙартыу

**ПЕРЕЧИТА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*прочитать заново*) яңынан (ҡабат) уҡып сығыу **2.** (*прочитать всё, многое*) уҡып бөтөрөү (сығыу)

**ПЕРЕЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **перечита́ть**

**ПЕРЕ́ЧИТЬ** *несов. кому*; *разг.* ҡаршы әйтеү, ҡаршылашыу

**ПЕРЕЧИЩА́ТЬ** *несов. см.* **перечи́стить**

**ПЕ́РЕЧНИЦА** *ж* борос һауыты

**ПЕРЕЧУ́ВСТВОВАТЬ** *сов. что* күпте кисереү (хис итеү, баштан үткәреү)

**ПЕРЕША́ГИВАТЬ** *несов. см.* **перешагну́ть**

**ПЕРЕШАГНУ́ТЬ** *сов. что*, *через кого-что* (аша) атлап сығыу (үтеү); **перешагну́ть че́рез поро́г** тупһаны аша атлап сығыу

**ПЕРЕШВЫРЯ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* ырғытып (быраҡтырып) бөтөрөү; **перешвыря́ть дрова́** утынды ырғытып бөтөрөү

**ПЕРЕШЕ́ЕК** *м* муйын

**ПЕРЕШЁПТЫВАТЬСЯ** *несов.* бышылдашыу, быш-быш һөйләшеү

**ПЕРЕШИБА́ТЬ** *несов. см.* **перешиби́ть**

**ПЕРЕШИБИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* бәреп (һуғып) һындырыу, өҙә (һындыра) һуғыу

**ПЕРЕШИВА́ТЬ** *несов. см.* **переши́ть**

**ПЕРЕШИ́ВКА** *ж см.* **переши́ть — перешива́ть**

**ПЕРЕШИ́ТЬ** *сов. что* яңынан (төҙәтеп) тегеү; **переши́ть костю́м** костюмды төҙәтеп тегеү

**ПЕРЕШНУРОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*зашнуровать заново*) яңынан (ҡабат) шнурлау; **перешнурова́ть боти́нок** ботинканы ҡабат шнурлау **2.** *разг.* (*зашнуровать всё, многое*) шнурлап ҡуйыу (сығыу)

**ПЕРЕШНУРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **перешнурова́ть**

**ПЕРЕШТО́ПАТЬ** *сов. что* йүрмәп сығыу (ҡуйыу); **перешто́пать чулки́** ойоҡтарҙы йүрмәп ҡуйыу

**ПЕРЕШТУКАТУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **перештукату́рить**

**ПЕРЕШТУКАТУ́РИТЬ** *сов. что* **1.** (*оштукатурить заново*) яңынан (ҡабат) штукатурлау, иҙмә менән һылау (шымартыу); **перештука-**

**ту́рить потоло́к** түшәмде ҡабат штукатурлау **2.** *разг.* (*оштукатурить всё, многое*) штукатурлап сығыу (бөтөрөү); **перештукату́рить все сте́ны** бөтә стеналарҙы штукатурлап сығыу

**ПЕРЕЩЕГОЛЯ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* арттырып (уҙҙырып) ебәреү (*берәй эштә, һүҙҙә һ.б.*)

**ПЕРЕЩЁЛКАТЬ** *сов. что*; *разг.* ярып (ватып) ашап бөтөрөү (бөтөү); **перещёлкать оре́хи** сәтләүекте ярып ашап бөтөү

**ПЕРЕЩУ́ПАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡапшап (һәрмәп) сығыу

**ПЕРЕЩУ́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **перещу́пать**

**ПЕРЕЭКЗАМЕНОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* яңынан (ҡабат) имтихан (экзамен) алыу

**ПЕРЕЭКЗАМЕНОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* яңынан (ҡабат) имтихан (экзамен) биреү (тапшырыу)

**ПЕРЕЭКЗАМЕНО́ВКА** *ж* яңынан (ҡабат) имтихан (экзамен) алыу

**ПЕРЕЭКЗАМЕНО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **переэкзаменова́ть**

**ПЕРЕЭКЗАМЕНО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **переэкзаменова́ться** **2.** *страд. от* **переэкзамено́вывать**

**ПЕРИГЕ́Й** *м*; *астр.* перигей (*Ай орбитаһының Ергә иң яҡын өлөшө*)

**ПЕРИ́ЛА** *только мн.* яндауыр; **ле́стничные пери́ла** баҫҡыс яндауыры

**ПЕРИ́МЕТР** *м*; *мат.* периметр

**ПЕРИ́НА** *ж* түшәк, күпмә; **пухо́вая пери́на** мамыҡ түшәк

**ПЕРИ́ОД** *м* **1.** осор, дәүер, ваҡыт, заман, ара; **зи́мний пери́од** ҡышҡы осор; **послевое́нный пери́од** һуғыштан һуңғы осор; **леднико́вый пери́од** *геол.* боҙлоҡ дәүере; **пери́од де́тства** бала ваҡыт; **пери́од ме́жду се́ссиями** сессиялар араһындағы ваҡыт **2.** *мат.* период **3.** *грам.* теҙем

**ПЕРИОДИЗА́ЦИЯ** *ж* осорҙарға (дәүерҙәргә) бүлеү; **периодиза́ция всеми́рной исто́рии** бөтә донъя тарихын осорҙарға бүлеү

**ПЕРИО́ДИКА** *ж собир.* ваҡытлы матбуғат (*гәзит һәм журналдар*); **нау́чная перио́дика** ғилми ваҡытлы матбуғат

**ПЕРИОДИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** миҙгел-миҙгел (ваҡыт-ваҡыт) булған (була торған); **периоди́ческие дожди́** миҙгел-миҙгел була торған ямғырҙар **2.** ваҡытлы, периодик; **периоди́ческая печа́ть** ваҡытлы матбуғат ♦ **периоди́ческая дробь** *мат.* периодик кәсер; **периоди́ческая систе́ма элеме́нтов** *хим.* элементтарҙың периодик системаһы

**ПЕРИОДИ́ЧНОСТЬ** *ж* ваҡыт-ваҡыт ҡабатланып тороу; **периоди́чность приро́дных явле́ний** тәбиғәт күренештәренең ваҡыт-ваҡыт ҡабатланып тороуы

**ПЕРИОДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **периоди́ческий** 1

**ПЕРИПЕТИ́И** *мн.* (*ед.* **перипети́я** *ж*) киҫкен боролош, ҡырҡа үҙгәреш (*берәйһенең тормошонда, яҙмышында йәки берәй хәл-ваҡиғала*)

**ПЕРИСКО́П** *м* перископ (*оптик прибор*); **периско́п подво́дной ло́дки** һыу аҫты кәмәһенең перископы

**ПЕРИСТОЛИ́СТНЫЙ** и **ПЕРИСТОЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ҡыйғас (ҡауырһын) япраҡлы; **перистоли́стная па́льма** ҡыйғас япраҡлы пальма

**ПЕ́РИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *зоол.* ҡауырһынлы; **пе́ристые кры́лья** ҡауырһынлы ҡанаттар **2.** ҡыйғас, ҡауырһын; **пе́ристые ли́стья** ҡыйғас япраҡтар ♦ **пе́ристые облака́** ҡыйғас болоттар

**ПЕРИТОНИ́Т** *м*; *мед.* перитонит (*ҡорһаҡ ярыһының шешеүе*)

**ПЕРИФЕРИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое перифериялағы; **периферийные ву́зы** перифериялағы юғары уҡыу йорттары

**ПЕРИФЕРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое периферик, үҙәктән ситтәге; **перифери́ческая не́рвная систе́ма** периферик нервы системаһы

**ПЕРИФЕРИ́Я** *ж* периферия (**1.** *үҙәктән ситтәге урындар, ойошмалар* **2.** *берәй нәмәнең үҙәктән алыҫлашҡан өлөшө*)

**ПЕРИФРА́З** *м* и **ПЕРИФРА́ЗА** *ж*; *лит.* перифраз, перифраза (*берәй һүҙҙең йәки әйтемдең мәғәнәһен киңәйтеп, һүҙбәйләнеш менән аңлатыу, мәҫ., "нефть" урынына — "ҡара алтын"*)

**ПЕРИФРАЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *лит.* перифразлау, перифраз менән биреү

**ПЕРЛ** *м* **1.** *уст.* ынйы **2.** *чего*; *перен.* йәүһәр, иң яҡшыһы, бына тигәне; **пе́рлы остроу́мия** тапҡыр һүҙҙең иң яҡшыһы

**ПЕРЛАМУ́ТР** мәрүәт (*ҡабырсаҡтың эске йылтыр ҡатламы*)

**ПЕРЛАМУ́ТРОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәрүәт ...ы; **перламу́тровый слой ра́ковины** ҡабырсаҡтың мәрүәт ҡатламы **2.** мәрүәт, мәрүәттән эшләнгән; **перламу́тровые пу́говицы** мәрүәт һиҙәптәр

**ПЕРЛО́ВКА** *ж*; *разг.* арпа ярмаһы

**ПЕРЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое арпа ...ы, арпа ярмаһынан әҙерләнгән; **перло́вая ка́ша** арпа бутҡаһы ♦ **перло́вая крупа́** арпа ярмаһы

**ПЕРМАНЕ́НТ** *м*; *разг.* перманент (*сәс бөҙрәләтеүҙең бер төрө*)

**ПЕРМАНЕ́НТНОСТЬ** *ж* даимилыҡ, өҙлөкһөҙлөк

**ПЕРМАНЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое даими, өҙлөкһөҙ, туҡтауһыҙ дауам иткән; **перманентное разви́тие** туҡтауһыҙ дауам иткән үҫеш

**ПЕРНА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡанатлы, ҡауырһынлы **2.** *в знач. сущ.* **перна́тые** *мн.* ҡоштар

**ПЕРО́** *с* **1.** ҡауырһын, ҡош йөнө, йөн; **гуси́ное перо́** ҡаҙ ҡауырһыны; **наби́ть поду́шку перо́м** мендәргә ҡош йөнө тултырыу **2.** (*орудие письма*) перо, ҡауырһын; **стально́е перо́** ҡорос перо; **чертёжное перо́** һыҙма пероһы **3.** *перен.* (*символ искусства писателя*) ҡәләм; **у него́ о́строе перо́** уның ҡәләме үткер **4.** (*плавник у рыбы*) ҡанат, йөҙгөс **5.** *разг.* (*зелень лука, чес-*

*нока*) ҡыяҡ (*һуғанда, һарымһаҡта*) **6.** *спец.* көрәк; **перо́ сохи́** һуҡа көрәге

**ПЕРОЧИ́ННЫЙ: перочи́нный нож (но́жик)** бәке

**ПЕРПЕНДИКУЛЯ́Р** *м*; *мат.* перпендикуляр; **опусти́ть перпендикуля́р на пло́скость** яҫылыҡҡа перпендикуляр төшөрөү

**ПЕРПЕ́ТУУМ-МО́БИЛЕ** *с нескл.* перпетуум-мобиле (*мәңгелек двигатель*)

**ПЕРРО́Н** *м* перрон; **выходи́ть на перро́н** перронға сығыу

**ПЕРРО́ННЫЙ,** -ая, -ое перрон ...ы; **перро́нный дежу́рный** перрон дежурныйы

**ПЕ́РСИ** *только мн.*; *уст., трад.-поэт.* күкрәк, түш

**ПЕРСИ́ДСКИЙ,** -ая, -ое фарсы ...ы; **перси́дский язы́к** фарсы теле

**ПЕ́РСИК** *м* персик, шафталы

**ПЕ́РСИКОВЫЙ,** -ая, -ое персик ...ы, шафталы ...ы; **пе́рсиковая ко́сточка** шафталы төшө; **пе́рсиковое варе́нье** шафталы ҡайнатмаһы

**ПЕРСО́НА** *ж* **1.** дәрәжәле кеше, оло шәхес (зат); **ва́жная персо́на** ҙур дәрәжәле кеше **2.** кеше; **серви́з на шесть персо́н** алты кешелек сервиз

**ПЕРСОНА́Ж** *м* персонаж (*әҙәби әҫәрҙә ҡатнашыусы*); **отрица́тельный персона́ж** кире персонаж; **коми́ческий персона́ж** комик персонаж

**ПЕРСОНА́Л** *м* персонал (*берәй ойошмала, учреждениела эшләүселәр*); **преподава́тельский персона́л** уҡытыусылар персоналы; **персона́л теа́тра** театр персоналы

**ПЕРСОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое персональ, шәхси; **персона́льное де́ло** персональ эш; **персона́льная пе́нсия** персональ пенсия

**ПЕРСПЕКТИ́ВА** *ж* **1.** (*видимое глазом пространство*) перспектива; **лес в перспекти́ве** перспективалағы урман **2.** перспектива, алыҫтан күренеш; **зако́ны перспекти́вы** алыҫтан күренеш закондары, киләсәктәге өмөтлө закондар **3.** *обычно мн.* **перспекти́вы**; *перен.* киләсәк, перспективалар; **перспекти́вы дальне́йшего разви́тия** артабанғы үҫеш перспективалары; **перспекти́вы рабо́ты** эш перспективалары ♦ **в перспекти́ве** яҡын киләсәктә

**ПЕРСПЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** перспектив; **перспекти́вный план рабо́ты** перспектив эш планы **2.** перспективалы; **перспекти́вный рабо́тник** перспективалы хеҙмәткәр

**ПЕРСТ** *м*; *трад.-поэт.* бармаҡ, ҡул бармағы ♦ **оди́н как перст** япа-яңғыҙы, бер үҙе

**ПЕ́РСТЕНЬ** *м* ҡашлы йөҙөк

**ПЕ́РСЫ** *мн.* фарсылар // *ед.* **перс** *м* фарсы ир-аты; **персия́нка** *ж* фарсы ҡатын-ҡыҙы

**ПЕРТУРБА́ЦИЯ** *ж* **1.** *книжн.* кинәт үҙгәреш, киҫкен боролош (сыуалыш, буталыш) **2.** *астр.* пертурбация (*планетаның юлынан тайпылыуы*)

**ПЕРФОКА́РТА** *ж*; *тех.* перфокарта

**ПЕРФОЛЕ́НТА** *ж*; *тех.* перфолента

**ПЕРФОРА́ТОР** *м* перфоратор (**1.** *ҡағыҙға, кинотаҫмаға һ.б. тишек тишкеләү приборы* **2.** *тау. тау тоҡомон быраулау машинаһы*)

**ПЕРФОРА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **перфори́ровать 2.** *тех.* тишектәр (*кино таҫмаһының йәки ҡағыҙ ситендәге*) **3.** *мед. см.* **прободе́ние**

**ПЕРФОРИ́РОВАНИЕ** *с см.* **перфори́ровать**

**ПЕРФОРИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *тех.* **1.** перфоратор менән тишкеләү; **перфори́ровать киноле́нту** кинотаҫманы перфоратор менән тишкеләү **2.** перфоратор менән (быраулап) тишеү

**ПЕ́РХОТЬ** *ж* ҡауаҡ

**ПЕРЦО́ВКА** *ж* боросло араҡы

**ПЕРЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое боросло; **перцо́вая во́дка** боросло араҡы

**ПЕРЧА́ТКА** *ж* бирсәткә ♦ **броса́ть перча́тку** *см.* **броса́ть**; **подня́ть перча́тку** *см.* **подня́ть**

**ПЕРЧИ́ТЬ** *несов. что* борослау, борос һибеү

**ПЕРШИ́ТЬ** *несов. безл.*; *разг.* (тамаҡ) ҡымырйыу; **у меня́ в го́рле перши́т** тамағым ҡымырйый

**ПЁС** *м* эт; **сторожево́й пёс** ҡарауыл эте ♦ **псу под хвост** һыуға һалыу, әрәм итеү

**ПЕ́СЕНКА** *ж*; *ласк. от* **пе́сня** ♦ **пе́сенка спе́та** *чья кемдеңдер* йыры йырланған

**ПЕ́СЕННИК** *м* (*сборник песен*) йыр китабы

**ПЕ́СЕННЫЙ,** -ая, -ое йыр ...ы; **пе́сенные жа́нры** йыр жанрҙары

**ПЕСЕ́ТА** *ж* песета (*Испания аҡса берәмеге*)

**ПЕСЕ́Ц** *м* (*зверь и его мех*) аҡ төлкө; **воротни́к из песца́** аҡ төлкө яға

**ПЁСИЙ,** -ья, -ье *разг.* эт ...ы; **пёсья ла́па** эт тәпәйе

**ПЕСКА́РЬ** *м* ташбаш

**ПЕСНОПЕ́НИЕ** *с* **1.** *церк.* дини йыр **2.** *трад.-поэт.* шиғыр, шиғри әҫәр

**ПЕСНЬ** *ж* **1.** *трад.-поэт. см.* **пе́сня 2.** *лит.* йыр (*эпик поэманың айырым бүлеге*) ♦ **песнь пе́сней** йырҙарҙың йыры (*ҙур әһәмиәткә эйә булған, күтәренке рухлы әҙәби әҫәргә ҡарата*)

**ПЕ́СНЯ** *ж* йыр; **засто́льная пе́сня** табын йыры; **колыбе́льная пе́сня** бишек йыры; **сложи́ть пе́сню** йыр сығарыу ♦ **до́лгая (дли́нная) пе́сня** осо-ҡырыйы күренмәгән эш; **лебеди́ная пе́сня** аҡҡош йыры (*таланттың һуңғы тапҡыр күренеүе, һуңғы әҫәре*); **ста́рая пе́сня** иҫке йыр (*теңкәгә тейгән, күп тапҡыр тыңланған һүҙ, фекер һ.б. ҡарата*); **тяну́ть одну́ и ту же пе́сню** бер үк йырҙы йырлау, бер балыҡ башын сәйнәү (*бер нәмәне күп һөйләү*)

**ПЕ́СО** *с нескл.* песо (*Латин Америкаһының ҡайһы бер дәүләттәрендә аҡса берәмеге*)

**ПЕСО́К** *м* **1.** ҡом; **речно́й песо́к** йылға ҡомо **2.** *мн.* **пески́** ҡомлоҡ **3.** *разг.* (*сахарный*) шәкәр ҡомо, ҡом шәкәр ♦ **песо́к сы́плется** *из кого* и *без*

*доп.*; *шутл.* ҡомо ҡойола (*бик ҡарт, кәре киткән кешегә ҡарата*)

**ПЕСО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* ҡом ...ы; **песо́чная пыль** ҡом саңы; **песо́чный я́щик** ҡом йәшниге **2.** ҡомло; **песо́чный ка́мень** ҡом таш **3.** *разг.* (*о цвете*) һоро, ҡом төҫөндәге; **песо́чное пальто́** ҡом төҫөндәге пальто **4.** *кул.* (*о тесте*) ыуалып торған; (*об изделии*) ыуалып торған ҡамырҙан бешерелгән; **песо́чное пече́нье** ыуалып торған ҡамырҙан бешерелгән печенье ♦ **песо́чные часы́** ҡом сәғәте

**ПЕССИМИ́ЗМ** *м* пессимизм, өмөтһеҙлек, рухи төшөнкөлөк; **впасть в пессими́зм** рухи төшөнкөлөккә бирелеү

**ПЕССИМИ́СТ** *м* и **ПЕССИМИ́СТКА** *ж* пессимист, рухы төшөнкө кеше, донъянан төңөлгән кеше

**ПЕССИМИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое пессимистик, төшөнкө рухлы; **пессимисти́ческий взгляд** төшөнкө рухлы ҡараш

**ПЕССИМИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **пессимисти́ческий**

**ПЕСТ** *м* төйгөс

**ПЕ́СТИК** *м* **1.** *уменьш. от* **пест** **2.** *бот.* емешлек

**ПЕ́СТОВАТЬ** *несов.* *кого-что* **1.** *уст.* ҡарап (бағып) үҫтереү; **пе́стовать ребёнка** баланы ҡарап үҫтереү **2.** *перен.*, *высок.* ҡәҙерләп (тәрбиәләп) үҫтереү

**ПЕСТРЕ́ТЬ I** *несов.* **1.** (*виднеться — о чём-л. пёстром*) сыбарланып (сыбар булып) күренеү **2.** *чем, от чего* сыбарланыу, сыбарланып тороу; **луга́ пестре́ют цвета́ми** болон сәскәләр менән сыбарланып тора **3.** (*становиться пёстрым*) сыбарланыу, сыбар төҫкә инеү

**ПЕСТРЕ́ТЬ II** *несов.* **1.** күренеү, күҙгә ташланыу (бәрелеү); **на сте́нах пестря́т афи́ши** стеналарҙа афишалар күҙгә ташлана **2.** *чем*; *перен.* тулыу, тулып ятыу; **статья́ пестри́т цита́тами** мәҡәлә цитаталар менән тулған **3.** *разг.* сып-сыбар (артыҡ сыбар) булыу, сыбарланып тороу; **мате́рия пестри́т** туҡыма артыҡ сыбар

**ПЕСТРИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* (*делать пёстрым*) сыбарлау **2.** *чем*; *перен.* йыш осрау, тулып ятыу; **сочине́ние пестри́т оши́бками** хаталар тулып ята **3.** *безл.* (күҙ алдын) сыбарлатыу; **в глаза́х пестри́т** күҙ алды сыбарлана

**ПЕСТРОТА́** *ж*; *прям.*, *перен.* сыбарлыҡ, төрлөлөк; **пестрота́ окра́ски** төҫтәр сыбарлығы; **пестрота́ пу́блики** публиканың төрлөлөгө

**ПЁСТРЫЙ,** -ая, -ое **1.** сыбар, ала-ҡола; **пёстрая ткань** сыбар туҡыма **2.** *перен.* (*неоднородный*) сыбар, төрлө; **пёстрый наро́д** төрлө халыҡ (кешеләр)

**ПЕСЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое аҡ төлкө, аҡ төлкө тиреһенән булған; **песцо́вый воротни́к** аҡ төлкө яға

**ПЕСЧА́НИК** *м* ҡомташ; **гли́нистый песча́ник** балсыҡлы ҡомташ

**ПЕСЧА́НИКОВЫЙ,** -ая, -ое ҡомташ ...ы; **песча́никовые отложе́ния** ҡомташ ултырмалары

**ПЕСЧА́НЫЙ,** -ая, -ое ҡомло; **песча́ный бе́рег реки́** йылғаның ҡомло яры

**ПЕСЧИ́НКА** *ж* ҡом бөртөгө

**ПЕ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое элмәк ...ы; **пе́тельный крючо́к** элмәк ҡаптырмаһы

**ПЕТИ́Т** *м*; *типогр.* петит (*ваҡ шрифт*)

**ПЕТИ́ЦИЯ** *ж* петиция (*юғары хөкүмәт органдарына күмәкләп яҙған үтенес хаты*)

**ПЕТЛИ́ЦА** *ж* **1.** (*петля*) элмәк **2.** (*нашивка*) петлица (*формалы кейемдең яға осона айырыу билдәһе итеп баҫыла торған таҫма*)

**ПЕ́ТЛЯ** и **ПЕТЛЯ́** *ж* **1.** тоҡан, элмәк; **завяза́ть петлю́** тоҡан бәйләү **2.** (*движение, извив, поворот и т.п.*) элмәк, борма **3.** (*при вязании*) күҙ; **спусти́ть петлю́** күҙ төшөрөп ҡалдырыу **4.** *охот.* (*силок*) тоҙаҡ, мәскәү **5.** (*на одежде*) элмәк; **обмета́ть пе́тли** элмәктәр йүрмәү **6.** күгән, сығанаҡ; **дверна́я петля́** ишек күгәне **7.** урау юл, боролоп үтеү, ҡамау; **сде́лать пе́тлю для обхо́да опа́сного ме́ста** хәүефле урынды урау юл менән үтеү ♦ **хоть в пе́тлю лезь** аҫылынырға ғына ҡала (*ауыр хәлгә ҡарата*); **мёртвая петля́** юғары пилотаж; **мета́ть пе́тли** алдау, юл йәшереү

**ПЕТЛЯ́ТЬ** *несов.*; *разг.* бормаланыу, урап-урап барыу (йүгереү, сабыу); **за́яц петля́ет** ҡуян урап-урап саба; **река́ петля́ет** йылға бормаланып аға

**ПЕТРОГРА́ФИЯ** *ж* петрография (*геологияның тау тоҡомон өйрәнә торған бүлеге*)

**ПЕТРУ́ШКА I** *ж* петрушка (*тәмләткес йәшелсә*)

**ПЕТРУ́ШКА II** **1.** *м* Петрушка (*урыҫ халыҡ ҡурсаҡ театрында төп комик ролде башҡарған ҡурсаҡ*) **2.** *ж*; *перен.*, *прост.* ахмаҡлыҡ, йүләрлек, мәғәнәһеҙлек; **что за петру́шка** был ниндәй ахмаҡлыҡ

**ПЕТУ́Х** *м* **1.** (*самец курицы*) әтәс **2.** (*самец некоторых др. птиц отряда куриных*) ата; **фаза́ний петýх** ата ҡырғауыл **3.** *разг.* (*о задиристом человеке*) сәркәш, әтәс ♦ **инде́йский петýх** *см.* **инде́йский**; **пусти́ть кра́сного петуха́** ҡыҙыл әтәс ебәреү (*ут төртөү*); **пусти́ть петуха́** сыйылдаҡ тауыш сығарыу (*йырлағанда*)

**ПЕТУ́ШИЙ,** -ья, -ье әтәс ...ы; **петýший хвост** әтәс ҡойроғо ♦ **петýший гребешо́к** *бот.* әтәс кикреге, хәтфә гөл

**ПЕТУШИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** әтәс ...ы; **петуши́ное перо́** әтәс ҡауырһыны **2.** (*задиристый*) әтәс кеүек ҡунып барған, ҡыҙрас (*кеше тураһында*) **3.** (*срывающийся — о голосе*) сыйылдаҡ, әсе

**ПЕТУШИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* әтәсләнеү

**ПЕТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* йырлау, көйләү; **петь пе́сню** йыр йырлау; **петь в о́пере** операла йырлау **2.** *что* башҡарыу, йырлау; **петь па́ртию Ле́нского** Ленский партияһын башҡарыу

3. (*о птицах*) һайрау; (*о петухе*) ҡысҡырыу 4. *кого-что*; *уст.*, *трад.-поэт.* данлау, маҡтап йырлау

**ПЕХО́ТА** *ж* пехота, йәйәүле ғәскәр

**ПЕХОТИ́НЕЦ** *м* пехотасы, йәйәүле һалдат

**ПЕХО́ТНЫЙ,** -ая, -ое пехота …ы, йәйәүле ғәскәр …ы; **пехо́тная диви́зия** пехота дивизияһы

**ПЕЧА́ЛИТЬ** *несов. кого-что* ҡайғыға һалыу (төшөрөү), хафаландырыу, хәсрәтләндереү, көйөндөрөү; **его́ что́-то печа́лит** уны ниҙер ҡайғыға һалған

**ПЕЧА́ЛИТЬСЯ** *несов.* ҡайғырыу, хәсрәтләнеү, бошоноу, хафаланыу, һағышланыу, көйөнөү; **что ты печа́лишься** һин нимәгә ҡайғыраһың

**ПЕЧА́ЛЬ** *ж* ҡайғы, хәсрәт, көйөнөс, һағыш, ғәм, зар, моң-зар ♦ **тебе́ кака́я печа́ль** һинең ни эшең бар

**ПЕЧА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*выражающий печаль*) ҡайғылы, ғәмле, хәсрәтле; **печа́льный взгляд** ҡайғылы ҡараш **2.** (*протекающий в печали*) зарлы, моңһоу, ямандыу; **печа́льная жизнь** зарлы тормош; **печа́льные дни** ямандыу көндәр **3.** (*достойный сожаления*) аянысльı, ҡыҙғаныс; **печа́льная у́часть** ҡыҙғаныс яҙмыш **4.** (*наполненный печалью*) ҡайғылы, һағышлы, моң-зарлы; **печа́льные мело́дии** һағышлы көйҙәр; **печа́льное изве́стие** ҡайғылы хәбәр

**ПЕЧА́ТАНИЕ** *с см.* **печа́тать**; **печа́тание книг** китап баҫтырыу

**ПЕЧА́ТАТЬ** *несов.* **1.** *что* баҫыу; **печа́тать газе́ты** гәзит баҫыу; **печа́тать рису́нки на обо́ях** обойға биҙәк баҫыу **2.** *кого-что* (*публиковать*) баҫтырыу, баҫтырып сығарыу; **печа́тать статьи́ в журна́ле** журналда мәҡәләләр баҫтырып сығарыу **3.** *что* фотоға (ҡағыҙға) төшөрөп баҫтырыу; **печа́тать ви́ды Уфы́** Өфө күренештәрен фотоға төшөрөп баҫтырыу

**ПЕЧА́ТАТЬСЯ** *несов.* **1.** баҫтырыу, баҫтырып сығарыу (*үҙ әҫәрҙәрендә*) **2.** *страд. от* **печа́тать**

**ПЕЧА́ТКА** *ж* (*печать на кольце*) бәләкәй мисәт (мөһөр)

**ПЕЧА́ТНИК** *м* баҫмасы (*полиграфия эшсеһе*)

**ПЕЧА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (китап) баҫыу …ы; **печа́тный стано́к** китап баҫыу станогы **2.** матбуғат …ы; **печа́тный о́рган** матбуғат органы **3.** баҫылған, баҫылып сыҡҡан; **печа́тный текст** баҫылған текст **4.** (*имеющий вид напечатанного*) баҫма; **писа́ть печа́тными бу́квами** баҫма хәрефтәр менән яҙыу **5.** (*с вытисненными узорами*) биҙәкле; **печа́тный пря́ник** биҙәкле перәник ♦ **печа́тный лист** *полигр.* баҫма табаҡ (*китаптың күләмен билдәләү берәмеге*)

**ПЕЧА́ТЬ** *ж* **1.** мисәт, мөһөр; **ге́рбовая печа́ть** гербле мөһөр; **заве́рить по́дпись печа́тью** ҡултамғаны мөһөр менән раҫлау **2.** *чего*; *перен.* эҙ, билдә, тамға; **печа́ть го́ря на лице́** йөҙҙә хәсрәт билдәһе **3.** баҫылыу, (китап) баҫыу; **кни́га вы́шла из печа́ти** китап баҫылып сыҡты **4.** (*внешний вид напечатанного*) баҫылған хәреф(тәр); **убо́ристая печа́ть** йыш баҫылған хәрефтәр; **кру́пная печа́ть** эре баҫылған хәрефтәр **5.** матбуғат; **периоди́ческая печа́ть** ваҡытлы матбуғат; **свобо́да печа́ти** матбуғат ирке; **вы́ступить в печа́ти** матбуғатта сығыш яһау; **рабо́тники печа́ти** матбуғат хеҙмәткәрҙәре

**ПЕЧЕНЕ́ГИ** *мн.* (*ед.* **печене́г** *м*) бәшнәктәр (*боронғо төрки ҡәбиләләр берләшмәһе*)

**ПЕЧЕ́НИЕ** *с см.* **печь** I; **пече́ние хле́ба** икмәк бешереү

**ПЕЧЁНКА** *ж* **1.** бауыр (*ашамлыҡ*); **жа́реная печёнка** ҡурылған бауыр **2.** *разг. см.* **пе́чень** ♦ **сиде́ть в печёнках** *у кого*; *прост.* теңкәһенә тейеү, йәнен көйҙөрөү

**ПЕЧЁНЫЙ,** -ая, -ое (һыуһыҙ) бешкән (бешерелгән); **печёный карто́фель** һыуһыҙ бешерелгән картуф

**ПЕ́ЧЕНЬ** *ж*; *анат.* бауыр; **боле́зни пе́чени** бауыр ауырыуҙары

**ПЕЧЕ́НЬЕ** *с* печенье; **сдо́бное пече́нье** тәмләткестәр ҡушып бешерелгән печенье

**ПЕ́ЧКА** *ж* мейес; **затопи́ть пе́чку** мейескә яғып ебәреү ♦ **от пе́чки (танцева́ть)** берәй эште йәнә баштан, ғәҙәтләнгән урынынан башлау

**ПЕЧНИ́К** *м* мейессе (*мейес сығарыусы*)

**ПЕЧНО́Й,** -ая, -ое мейес …ы; **печна́я труба́** мейес мөрйәһе; **печно́е отопле́ние** мейес яғып йылытыу

**ПЕЧУ́РКА** *ж*; *разг.* бәләкәй мейес

**ПЕЧЬ I** *несов.* **1.** *что* бешереү; **печь пироги́** бәлеш бешереү **2.** *кого-что*, *во что* и *без. доп.* ҡыҙҙырыу; **со́лнце печёт** ҡояш ҡыҙҙыра ♦ **печь как блины́** ҡоймаҡ ҡойғандай бик тиҙ башҡарыу

**ПЕЧЬ II** *ж* мейес; **голла́ндская печь** голланд мейесе; **топи́ть печь** мейес яғыу

**ПЕ́ЧЬСЯ I** *несов.* **1.** (һыуһыҙ) бешеү, бешеп ултырыу; **карто́фель печётся в золе́** картуф көлдә бешә **2.** *разг.* (*на солнце*) яныу, бешеү **3.** *страд. от* **печь** I

**ПЕ́ЧЬСЯ II** *несов. о ком-чём* ҡайғыртыу, хәстәрләү, хәстәрен күреү; **он печётся то́лько о себе́** ул үҙен генә ҡайғырта

**ПЕШЕХО́Д** *м* йәйәүле, йәйәү йөрөүсе

**ПЕШЕХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йәйәүлеләр …ы, йәйәү йөрөү өсөн; **пешехо́дная тропи́нка** йәйәүлеләр һуҡмағы **2.** йәйәү; **пешехо́дное движе́ние** йәйәү хәрәкәт итеү (йөрөү)

**ПЕ́ШИЙ,** -ая, -ее **1.** (*идущий пешком*) йәйәүле; **пе́шие путеше́ственники** йәйәүле сәйәхәтселәр **2.** (*совершаемый пешком*) йәйәү; **пе́ший путь** йәйәү үткән юл **3.** (*пехотный*) йәйәүлеләр …ы; **пе́ший строй** йәйәүлеләр сафы ♦ **пе́шим хо́дом** йәйәүләп

**ПЕ́ШКА** *ж* **1.** пешка; **пойти́ пе́шкой** пешка менән йөрөү **2.** *перен.*, *разг.* бәләкәй кеше, ҡурсаҡ, пешка

**ПЕШКО́М** *нареч.* йәйәү(ләп); **идти́ пешко́м** йәйәү китеү

**ПЕШНЯ́** и **ПЕ́ШНЯ** *ж* һөймән; **проби́ть лёд пешнёй** һөймән менән боҙ тишеү

**ПЕЩЕ́РА** *ж* мәмерйә, мәғәрә; **пеще́ра Шульган-Та́ш** Шүлгән-Таш мәмерйәһе

**ПЕЩЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәмерйә ...ы, мәғәрә ...ы; **пеще́рный свод** мәмерйә көмбәҙе **2.** мәмерйәләге; **пеще́рная река́** мәмерйәләге йылға **3.** (*относящийся к доисторическому времни*) мәмерйә ...ы, мәғәрә ... ы, мәмерйәлә (мәғәрәлә) йәшәгән; **пеще́рный челове́к** мәмерйә кешеһе

**ПИАЛА́** и **ПИА́ЛА** *ж* каса; **пить чай из пиа́лы** каса менән сәй эсеү

**ПИАНИ́НО** *с нескл.* пианино; **игра́ть на пиани́но** пианинола уйнау

**ПИАНИ́СТ** *м* и **ПИАНИ́СТКА** *ж* пианиносы (*пианинола уйнаусы*)

**ПИА́НО** *муз.* **1.** *нареч.* пиано, әкрен генә, һалмаҡ ҡына; **петь пиа́но** әкрен генә йырлау; **игра́ть пиа́но** һалмаҡ ҡына уйнау **2.** *с нескл.* пиано (*әкрен башҡарылған музыкаль әҫәр йәки уның өлөшө*)

**ПИА́СТР** *м* пиастр (**1.** *Төркиә, Мысыр һәм ҡайһы бер илдәрҙең аҡса берәмеге* **2.** *боронғо Испанияның ваҡ аҡсаһы булған песоның итальянса атамаһы*)

**ПИВНА́Я** *ж* һырахана

**ПИВНО́Й,** -ая, -ое һыра ...ы; **пивно́й заво́д** һыра заводы; **пивна́я пе́на** һыра күбеге

**ПИ́ВО** *с* һыра; **пе́нистое пи́во** күбекле һыра; **пить пи́во** һыра эсеү

**ПИВОВА́Р** *м* һырасы (*һыра ҡайнатыусы*)

**ПИВОВАРЕ́НИЕ** *с* һыра ҡайнатыу

**ПИВОВА́РЕННЫЙ,** -ая, -ое һыра ҡайнатыу ...ы; **пивова́ренный заво́д** һыра ҡайнатыу заводы

**ПИ́ГАЛИЦА** *ж* **1.** *зоол.* тәгәрлек **2.** *разг.* (*о человеке*) сибек кеше

**ПИГМЕ́Й** *м* **1.** пигмей, иргәйел **2.** *перен., презр.* (*ничтожный человек*) түбән кеше, пигмей

**ПИГМЕ́НТ** *м* пигмент (*тереклек һәм үҫемлек туҡымаһына төҫ бирә торған матдә*)

**ПИГМЕНТА́ЦИЯ** *ж* берәй төҫ алыу; **пигмента́ция гла́за** күҙҙең берәй төҫ алыуы

**ПИГМЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое пигмент ...ы; **пигме́нтные кле́тки** пигмент күҙәнәктәре

**ПИДЖА́К** *м* пинжәк, пиджак; **однобо́ртный пиджа́к** бер яҡ ҡаптырмалы пинжәк; **носи́ть пиджа́к** пинжәк кейеп йөрөү

**ПИЖА́МА** *ж* пижама; **мужска́я пижа́ма** ирҙәр пижамаһы

**ПИЖА́МНЫЙ,** -ая, -ое пижама ...ы; **пижа́мные брю́ки** пижама салбары

**ПИ́ЖМА** *ж* гөлбаҙран

**ПИЖО́Н** *м*; *разг.* фырт егет, пижон

**ПИК** *м* пик, сусаҡ, суҡы (*тауҙа*); **пик горы́** тау сусағы ♦ **часы́ пик** пик сәғәте (*транспорт, электр станцияһы һ.б. эшендә иң көсөргәнешле ваҡыт*)

**ПИ́КА** *ж* һөңгө; **пронзи́ть пи́кой** һөңгө менән сәнсеү ♦ **в пи́ку** *кому кемгәлер* үс (асыу) итеп

**ПИКАДО́Р** *м* пикадор (*үгеҙҙе һөңгө менән сәнсеп ярһытыусы һыбайлы — үгеҙҙәр һуғышында ҡатнашыусы*)

**ПИКА́НТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡырҡыу, әсе, өткөс; **пика́нтная подли́вка** ҡырҡыу тоҙлоҡ **2.** *перен.* (*возбуждающий острый интерес*) ҡыҙыҡтырғыс, уятҡыс; **пика́нтная но́вость** ҡыҙыҡтырғыс яңылыҡ **3.** *перен.* (*не вполне пристойный*) әҙәпһеҙ, тәртипһеҙ; **пика́нтный анекдо́т** әҙәпһеҙ көләмәс **4.** *перен.* (*соблазнительный*) тартып торған, ҡыҙығырлыҡ; **пика́нтная вне́шность** тартып торған ҡиәфәт

**ПИКА́П** *м* пикап (*йөк автомобиленең бер төрө*)

**ПИКЕ́ I** *с нескл.* (*ткань*) пике (*туҡыма төрө*); **пла́тье из пике́** пике күлдәк

**ПИКЕ́ II** *с нескл.*; *ав.* пике (*самолёттың ҙур тиҙлектә аҫҡа табан шыҡыйыуы*); **войти́ в пике́** пикеға инеү; **вы́йти из пике́** пикенан сығыу

**ПИКЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое пике, пикенан тегелгән; **пике́йное покрыва́ло** пике япма

**ПИКЕ́Т I** *м* пикет (**1.** *ҙур булмаған һаҡсы төркөм* **2.** *баш күтәргән районда күҙәтеп йөрөүсе эш ташлаған эшселәр төркөмө*); **ко́нный пике́т** атлы пикет (*атлы һаҡсылар төркөмө*); **пехо́тный пике́т** йәйәүле күҙәтселәр отряды (пикеты); **быть в пике́те** пикетта булыу (йөрөү)

**ПИКЕ́Т II** *м* пикет (**1.** *геод. берәй урындың һыҙымын төшөргән ваҡытта бейеклеген билдәләү өсөн алынған нөктә* **2.** *геод. берәй урындың бейеклеген билдәләгәндә ергә ҡағып ҡуйыла торған номерлы ҡаҙыҡ* **3.** *т.юл. тимер юл линияларын үлсәү берәмеге*; *бер пикет — 100 м*)

**ПИКЕ́ТЧИК** *м* пикетсы (*эш ташлап пикетта ҡатнашыусы кеше*)

**ПИ́КИ** *мн.* (*ед.* **пи́ка** *ж*; *разг.*); *карт.* ҡарға

**ПИКИ́РОВАНИЕ** *с см.* **пики́ровать**

**ПИКИРОВА́НИЕ** *с см.* **пикирова́ть**

**ПИКИ́РОВАТЬ** *сов., несов.*; *ав.* пикеға китеү

**ПИКИРОВА́ТЬ** *сов., несов.*; *с.-х.* күсереп ултыртыу; **пикирова́ть се́янцы** үҫентеләрҙе күсереп ултыртыу

**ПИКИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* (*обмениваться колкостями*) сәнскеле (төртмә) һүҙҙәр әйтешеү

**ПИКИРО́ВКА I** *ж*; *с.-х. см.* **пикирова́ть**

**ПИКИРО́ВКА II** *ж см.* **пики́роваться**

**ПИКНИ́К** *м* пикник (*күңел асыу өсөн ҡала, ауыл ситенә сығып яһалған йыйын*)

**ПИ́КНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** сый итеү **2.** (*возразить*) ҡаршы өндәшеү

**ПИ́КОВЫЙ I,** -ая, -ое ҡарға ...ы; **пи́ковая да́ма** ҡарға дама; **пи́ковая восьмёрка** ҡарға һигеҙлек ♦ **пи́ковое положе́ние** мөшкөл хәл;

**оста́ться при пи́ковом интере́се** уңышһыҙлыҡҡа осрау, ҡоро ҡалыу

**ПИ́КОВЫЙ II,** -ая, -ое *спец.* көсөргәнешле, иң юғары; **пи́ковый расхо́д эне́ргии** энергияның көсөргәнешле тотоноу мәле

**ПИКРИ́НОВЫЙ: пикри́новая кислота́** пикрин кислотаһы (*артиллерияла ҡулланылған ағыулы шартлағыс матдә*)

**ПИКТОГРА́ММА** *ж*; *спец.* пиктограмма (*боронғо һүрәт яҙыуында ҡулланылған шартлы рәсем*)

**ПИКТОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *спец.* пиктография ...ы, пиктографик; **пиктографи́ческое письмо́** пиктография яҙыуы

**ПИКТОГРА́ФИЯ** *ж*; *спец.* пиктография (*пиктограммалар менән башҡарылған бик боронғо яҙма*)

**ПИЛА́** *ж* **1.** (*инструмент*) бысҡы; **ди́сковая пила́** түңәрәк бысҡы; **электри́ческая пила́** электр бысҡыһы **2.** *разг.* игәү (*мыжыҡ кеше*)

**ПИЛА́-РЫ́БА** *ж* бысҡыбалыҡ

**ПИЛЁНЫЙ,** -ая, -ое бысылған, киҫелгән; (*о сахаре*) шаҡмаҡлы; **пилёные дрова́** бысылған утын

**ПИЛИ́КАТЬ** *несов.*; *разг.* сыйылдатыу, тыҙылдатыу, сыйылдығын (тыҙылдығын) сығарыу; **пили́кать на скри́пке** скрипканы сыйылдатыу (сыйылдығын сығарыу)

**ПИЛИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* бысыу, киҫеү; **пили́ть дрова́** утын бысыу **2.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* игәү, йөҙәтеү **3.** *что*; *разг.* (*опиливать*) игәү; **пили́ть дета́ль напи́льником** игәү менән деталь игәү

**ПИЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бысылыу, киҫелеү; **брёвна пи́лятся легко́** бүрәнә еңел бысыла **2.** *страд. от* **пили́ть**

**ПИ́ЛКА I** *ж см.* **пили́ть**

**ПИ́ЛКА II** *ж* **1.** ҡул бысҡыһы **2.** (*для ногтей*) игәү, тырнаҡ игәүе

**ПИЛОРА́МА** *ж* пилорама (*таҡта ярыу яйланмаһы*)

**ПИЛО́Т** *м* осоусы, пилот

**ПИЛОТА́Ж** *м* пилотаж (*осҡос аппараттарҙы йөрөтөү оҫталығы*)

**ПИЛОТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **пилоти́ровать**

**ПИЛОТИ́РОВАТЬ** *несов. что* идара итеү (*осоу аппараты менән*); **пилоти́ровать самолёт** самолёт менән идара итеү

**ПИЛО́ТКА** *ж* пилотка; **носи́ть пило́тку** пилотка кейеү

**ПИ́ЛЬЩИК** *м* бысҡысы, бысыусы

**ПИЛЮ́ЛЯ** *ж* төймә (борсаҡ) дарыу ♦ **золоти́ть пилю́лю** юхаланырға тырышыу (*насарлыҡ эшләп, шуны йомшартырға тырышыу*); **проглоти́ть пилю́лю** ауыр һүҙҙе өндәшмәй үткәреү (йотоу)

**ПИЛЯ́СТРА** *ж* и **ПИЛЯ́СТР** *м*; *архит.* пилястра, пилястр (*бер яғы стенаға инеп торған дүрт ҡырлы ярым колонна*)

**ПИМЫ́** *мн.* (*ед.* **пим** *м*) **1.** (*меховые сапоги*) тире итек (*төньяҡ халыҡтарында*) **2.** (*валенки*) быйма

**ПИНА́ТЬ** *несов. кого-что*; *прост.* тибеү, типкеләү

**ПИНА́ТЬСЯ** *несов.*; *прост.* **1.** тибеү, тибешеү **2.** *страд. от* **пина́ть**

**ПИНГВИ́Н** *м* пингвин (*Антарктидала йәшәүсе, осмай торған эре диңгеҙ ҡошо*)

**ПИНГ-ПО́НГ** *м* пинг-понг (*өҫтәл теннисы*)

**ПИНЕ́ТКИ** *мн.* (*ед.* **пине́тка** *ж*) быштый, сүбәк, пинетка

**ПИНО́К** *м*; *разг.* тибеү; **дать пинка́** тибеп ебәреү

**ПИНЦЕ́Т** *м* эҫкәк

**ПИ́НЧЕР** *м* пинчер (*эт тоҡомо*)

**ПИО́Н** *м* дөр-дөр, пион (*баҡса гөлө*)

**ПИОНЕ́Р I** *м* пионер (**1.** *билдәһеҙ илгә, төбәккә башлап барып йәшәй башлаған кеше* **2.** *күсм. ниндәйҙер эшкә башланғыс һалған кеше*)

**ПИОНЕ́Р II** *м* пионер (*үҫмерҙәр ойошмаһы вәкиле*)

**ПИОНЕРВОЖА́ТЫЙ** *м* и **ПИОНЕРВОЖА́ТАЯ** *ж* пионервожатый

**ПИОНЕ́РИЯ** *ж собир.* пионерҙар

**ПИОНЕ́РСКИЙ,** -ая, -ое пионер(ҙар) ...ы; **пионе́рский га́лстук** пионер галстугы

**ПИПЕ́ТКА** *ж* тамыҙғыс (*күҙгә, танауға дарыу һалыу өсөн*)

**ПИР** *м* һый, мәжлес, туй; **сва́дебный пир** туй мәжлесе ♦ **пир на весь мир** бик ҙур һәм мул мәжлес; **в чужо́м пиру́ похме́лье** *см.* **похме́лье**

**ПИРАМИ́ДА** *ж*; *в разн. знач.* пирамида; **пятигра́нная пирами́да** *мат.* биш ҡырлы пирамида; **начерти́ть пирами́ду** *мат.* пирамида һыҙыу; **еги́петские пирами́ды** Мысыр пирамидалары; **пирами́да ру́жей** *воен.* пирамида һымаҡ итеп ҡуйылған мылтыҡтар; **гимна́сты постро́или пирами́ду** гимнастар пирамида яһаны

**ПИРАМИДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое пирамидаль, пирамида һымаҡ (рәүешле); **пирамида́льный то́поль** пирамидаль тирәк

**ПИРАМИДО́Н** *м* пирамидон (*дарыу*)

**ПИРА́Т** *м* пират, диңгеҙ юлбаҫары

**ПИРА́ТСКИЙ,** -ая, -ое пират(тар) ...ы; **пира́тское су́дно** пираттар карабы

**ПИРА́ТСТВО** *с* пиратлыҡ, диңгеҙ юлбаҫарлығы

**ПИРОВА́ТЬ** *несов.* һыйҙа (мәжлестә) булыу, һыйланыу

**ПИРО́Г** *м* бәлеш; **пиро́г с мя́сом** ит бәлеше

**ПИРО́ГА** *ж* ҡайыҡ (*Үҙәк һәм Көньяҡ Америка индеецтарында тышы көплө, оҙон тар кәмә*)

**ПИРО́ЖНОЕ** *с* пирожный

**ПИРОЖО́К** *м*; *разг.* бөйөрөк; **пирожки́ с карто́фелем** картуф бөйөрөгө

**ПИРОКСИЛИ́Н** *м* пироксилин (*шартлағыс матдәнең бер төрө*)

**ПИРО́МЕТР** *м* пирометр (*юғары температураларҙы үлсәү приборы*)

**ПИРОТЕ́ХНИК** *м* пиротехник (*пиротехника белгесе*)

**ПИРОТЕ́ХНИКА** *ж* пиротехника (*техниканың яна торған составтар эшләү, уларҙы төрлө осраҡта, мәҫ., ракета осорғанда, фейерверк һ.б. эшләгәндә, ҡулланыу менән бәйле тармағы*)

**ПИ́РРОВ: пи́ррова побе́да** Пирр еңеүе (*аҡланмаҫлыҡ ҡорбандар бәрәбәренә яуланған еңеү*)

**ПИРС** *м*; *мор.* пирс (*караптар туҡтау өсөн эшләнгән ҡоролма*)

**ПИРУ́ШКА** *ж*; *разг.* һыйлы бәләкәй мәжлес

**ПИРУЭ́Т** *м* пируэт (*бейегәндә аяҡ осонда бер әйләнеп сығыу*)

**ПИ́РШЕСТВО** *с* мул һыйлы табын

**ПИСА́КА** *м* и *ж*; *разг.* яҙыусы ишараты

**ПИСА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **писа́ть** **2.** *разг.*, *ирон.* яҙма, яҙыу ♦ **Свяще́нное Писа́ние** Изге Китап (*мәҫ.*, *Иҫке Ғәһет*, *Ҡөрьән*)

**ПИ́САНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яҙма, яҙылған; **пи́саная инстру́кция** яҙылған инструкция **2.** (*расписной*) биҙәрләнгән, биҙәрле; **пи́саная дуга́** биҙәрле дуға ♦ **пи́саная краса́вица** ҡойоп (яһап) ҡуйған кеүек матур ҡатын-ҡыҙ; **пи́саный краса́вец** һыу һөлөгө кеүек егет, ҡойоп (яһап) ҡуйған кеүек ир-егет; **как (сло́вно) по пи́саному** бик шыма, бик оҫта

**ПИ́САРЬ** *м* писарь; **ро́тный пи́сарь** рота писары

**ПИСА́ТЕЛЬ** *м* яҙыусы, әҙип; **писа́тельница** *ж* яҙыусы, әҙибә

**ПИСА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое яҙыусы(лар) ...ы, әҙип(тәр) ...ы, яҙыусылыҡ (әҙиплек) ...ы; **писа́тельский тала́нт** яҙыусылыҡ таланты; **писа́тельская среда́** яҙыусылар мөхите

**ПИСА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* яҙыу; **писа́ть ме́лко** ваҡ яҙыу; **писа́ть бу́квы** хәрефтәр яҙыу; **ребёнок уже́ пи́шет** бала яҙа (башлаған) инде; **ру́чка не пи́шет** ручка яҙмай; **писа́ть письмо́** хат яҙыу **2.** *что* и *без доп.* (*сочинять*) яҙыу, ижад итеү; **писа́ть расска́зы** хикәйәләр яҙыу; **писа́ть о́перу** опера яҙыу **3.** *кого-что* и *без доп.* (*рисовать*) яҙыу, һүрәт төшөрөү (эшләү, яһау); **писа́ть портре́т** портрет төшөрөү (эшләү)

**ПИСА́ТЬСЯ** *несов.* (*1 и 2 л. не употребляются*) яҙылыу; **здесь пи́шется “о”** был урында “о” яҙыла

**ПИСЕ́Ц** *м*; *ист.* күсереүсе (*күсереп яҙыусы*)

**ПИСК** *м* сыйылдау, сырҡылдау, сырылдау, сипылдау; **писк мыше́й** сысҡандар сыйылдауы; **писк птенцо́в** ҡош балаларының сырҡылдауы

**ПИСКЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое сыйылдаҡ, сырҡылдаҡ, сәрелдәк; **пискли́вый го́лос** сәрелдәк тауыш; **пискли́вый ребёнок** сыйылдаҡ бала

**ПИСКЛЯ́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **пискли́вый**

**ПИ́СКНУТЬ** *сов.* сый (сәр, сыр) итеп ҡуйыу

**ПИСКУ́Н** *м* и **ПИСКУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* сыйылдаҡ, сырылдаҡ, сәрелдәк

**ПИССУА́Р** *м* писсуар (*бәҙрәфтә бәүел ағыҙыу өсөн ҡуйылған раковина*)

**ПИСТОЛЕ́Т** *м* пистолет; **стреля́ть из пистоле́та** пистолеттан атыу

**ПИСТОЛЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое пистолет ...ы; **пистоле́тная кобура́** пистолет кобураһы

**ПИСТО́Н** *м* пистон (**1.** *патронда яһауын тоҡандыра торған бәләкәс ҡалпаҡ* **2.** *уйынсыҡ пистолетта шартлатыу өсөн әҙерләнгән махсус ҡағыҙ* **3.** *шнур кейҙереү өсөн ҡатырға, күн һ.б. нәмәнең тишегенә беркетелгән металл тирәс* **4.** *муз. тынлы музыка ҡоралының клапаны*)

**ПИСЧЕБУМА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яҙыу ҡағыҙы ...ы; **писчебума́жная фа́брика** яҙыу ҡағыҙы фабрикаһы **2.** яҙыу-һыҙыу ...ы; **писчебума́жные принадле́жности** яҙыу-һыҙыу кәрәк-яраҡтары

**ПИ́СЧИЙ,** -ая, -ее яҙыу ...ы; **пи́счая бума́га** яҙыу ҡағыҙы

**ПИСЬМЕНА́** *только мн.* яҙыу тамғалары, хәрефтәр; **дре́вние письмена́** боронғо яҙыу тамғалары

**ПИ́СЬМЕННОСТЬ** *ж* **1.** яҙыу, әлифба; **башки́рская пи́сьменность** башҡорт яҙыуы **2.** (*совокупность письменных памятников эпохи, народа*) яҙмалар, яҙма әҙәбиәт; **древнетю́ркская пи́сьменность** боронғо төрки яҙмалар

**ПИ́СЬМЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** яҙма; **пи́сьменная рабо́та** яҙма эш; **пи́сьменный язы́к** яҙма тел **2.** яҙыу ...ы; **пи́сьменный стол** яҙыу өҫтәле

**ПИСЬМО́** *с* **1.** хат; **заказно́е письмо́** заказлы хат; **написа́ть письмо́** хат яҙыу **2.** яҙыу, яҙа белеү; **разли́чные спо́собы письма́** яҙыуҙың төрлө ысулдары **3.** (*письменность*) яҙыу, әлифба; **ара́бское письмо́** ғәрәп яҙыуы **4.** (*документ*) ҡағыҙ; **гаранти́йное письмо́** гарантия ҡағыҙы

**ПИСЬМОНО́СЕЦ** *м* хат ташыусы (таратыусы)

**ПИТА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **пита́ть** 1, 2 — **пита́ться** **2.** аҙыҡ, ризыҡ, ашау; **моло́чное пита́ние** һөт аҙығы; **диети́ческое пита́ние** диетик аҙыҡ **3.** *спец.* энергия, туйындырыу көсө; **пита́ние ра́ции** рацияға кәрәкле энергия ♦ **обще́ственное пита́ние** йәмәғәт туҡланыуы

**ПИТА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* туҡлыҡлылыҡ; **пита́тельность кормо́в** аҙыҡтарҙың туҡлыҡлылығы

**ПИТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** туҡлыҡлы, файҙалы; **пита́тельная пи́ща** туҡлыҡлы аҙыҡ **2.** туйҙырыусы, туҡландырыусы; **пита́тельный насо́с** туҡландырыусы насос

**ПИТА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого* туҡландырыу, туйҙырыу, ашатыу **2.** *что* (*снабжать необходимым*) туйындырыу, тәьмин итеү; **пита́ть го́род электроэне́ргией** ҡаланы электр энергияһы менән тәьмин итеү **3.** *что*; *перен.* бағлау, һаҡлау, то-

тоу; **пита́ть наде́жду** өмөт бағлау; **пита́ть зло́бу** асыу һаҡлау

**ПИТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *кем-чем* (*кормиться*) ашау, ейеү, туҡланыу; **пита́ться овоща́ми** йәшелсә менән туҡланыу **2.** туйыныу, туҡланыу, аҙыҡланыу; **пита́ться в столо́вой** ашханала туҡланыу **3.** *чем* тәьмин ителеү, файҙаланыу, туйыныу; **заво́д пита́ется углём** завод күмер менән тәьмин ителә **4.** *страд. от* **пита́ть** 1, 2

**ПИТЕКА́НТРОП** *м* питекантроп (*маймылға оҡшаған бик боронғо ҡаҙылдыҡ кеше төрө*)

**ПИТО́МЕЦ** *м чей, кого-чего* тәрбиәләнеүсе, тәрбиәләнгән кеше; **пито́мец университе́та** университетта тәрбиәләнгән кеше

**ПИТО́МНИК** *м* питомник; **обезья́ний пито́мник** маймыл питомнигы; **плодоя́годный пито́мник** емеш-еләк питомнигы

**ПИТО́Н** *м* питон (*тропикта йәшәүсе ағыуһыҙ быуар йылан*)

**ПИТЬ** *несов. что* и *без доп.* эсеү; **пить чай** сәй эсеү; **пить за здоро́вье дру́га** дуҫтың һаулығына эсеү ♦ **пить го́рькую (мёртвую)** ныҡ эскегә һалышыу; **пить кровь** ҡанын эсеү (яфалау); **как пить дать** һис шикһеҙ (һүҙһеҙ)

**ПИТЬЁ** *с* **1.** *см.* **пить**; **употребля́ть для питья́** эсеүгә тотоноу **2.** эсемлек; **о́чень вку́сное питьё** бик тәмле эсемлек

**ПИТЬЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** эсәр, эсеүгә (эсергә) яраҡлы; **питьева́я вода́** эсеүгә яраҡлы һыу **2.** эсеүгә (эсергә) тәғәйенләнгән, эсә торған; **питьева́я кру́жка** һыу эсә торған көрөшкә

**ПИХА́ТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** *кого-что* (*толкать*) этеү, төртөү, эткеләү, төрткөләү; **пиха́ть ло́ктем** терһәк менән төрткөләү **2.** *что* (*торопливо засовывать что-л. куда-л.*) тығыу, тығыҙлап тултырыу; **пиха́ть ве́щи в чемода́н** әйберҙәрҙе сумаҙанға тығыу

**ПИХА́ТЬСЯ** *несов.*; *прост.* **1.** (*толкаться*) этешеү, төртөшөү **2.** *страд. от* **пиха́ть**

**ПИХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* этеп (төртөп) ебәреү **2.** тығып ҡуйыу, тығыҙлап тултырып ҡуйыу

**ПИ́ХТА** *ж* аҡ шыршы

**ПИ́ХТОВЫЙ,** -ая, -ое аҡ шыршы ...ы; **пи́хтовая смола́** аҡ шыршы сайыры; **пи́хтовое ма́сло** аҡ шыршы майы

**ПИ́ЧКАТЬ** *несов. кого, чем*; *разг.* **1.** көсләп (кәрәгенән артыҡ) ашатыу, тығындырыу; **пи́чкать ребёнка сла́достями** балаға тәмле-татлыны кәрәгенән артыҡ ашатыу **2.** *перен.* баш(ын) ҡатырыу (*юҡ-бар нәмә менән*); **пи́чкать нену́жными све́дениями** кәрәкһеҙ хәбәрҙәр менән баш ҡатырыу

**ПИЧУ́ГА** и **ПИЧУ́ЖКА** *ж*; *разг.* ҡошҡай, ҡошсоҡ

**ПИ́ШУЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **писа́ть** **2.** *прил.* яҙыу ...ы, яҙа торған; **пи́шущая маши́нка** яҙыу машинкаһы

**ПИ́ЩА** *ж* **1.** аш, аҙыҡ, ризыҡ, аш-һыу, аҙыҡ-түлек, тәғәм, ниғмәт, ашамлыҡ; **мясна́я пи́ща** ит аҙығы; **расти́тельная пи́ща** үҫемлек аҙығы; **мо-ло́чная пи́ща** һөт ашы; **пригото́вить пи́щу** аш-һыу әҙерләү **2.** *перен.* аҙыҡ; **духо́вная пи́ща** рухи аҙыҡ ♦ **дава́ть пи́щу** *чему*, *для чего* аҙыҡ биреү, сәбәпсе булыу (*берәй нәмәнең таралыуына, килеп сығыуына*)

**ПИЩА́ТЬ** *несов.* **1.** (*о птицах, некоторых животных*) сырылдау, сипылдау; (*о щенятах*) сәңкелдәү; (*о ребёнке*) сәрелдәү, сыйылдау; **цыпля́та пища́т** себештәр сипылдай **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*говорить, петь тонким голосом*) сыйылдау, сәрелдәү

**ПИЩЕВАРЕ́НИЕ** *с* аш һеңеү (һеңдереү); **проце́сс пищеваре́ния** аш һеңеү процесы

**ПИЩЕВАРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аш һеңеү (һеңдереү) ...ы; **пищевари́тельные о́рганы** аш һеңдереү ағзалары

**ПИЩЕВО́Д** *м*; *анат.* ҡыҙыл үңәс, аш юлы

**ПИЩЕВО́Й,** -ая, -ое *в разн. знач.* аҙыҡ ...ы, ашамлыҡ ...ы, аш ...ы, аҙыҡ-түлек ...ы; **пищевы́е отхо́ды** аҙыҡ-түлек ҡалдыҡтары; **пищева́я соль** аш тоҙо; **пищева́я промы́шленность** аҙыҡ-түлек сәнәғәте

**ПИ́ЩИК** *м* һыбыҙғы (**1.** *ҡош аулаусы ҡуллана торған ҡорамал* **2.** *тынлы музыка ҡоралында тауыш сығарыу пластинкаһы*)

**ПИЩУ́ХА** *ж* сипылдаҡ (*һайрар ҡош*)

**ПИЯ́ВКА** *ж* һөлөк; **ста́вить пия́вки** һөлөк һалыу

**ПЛАВ: на плаву́** *спец.* һыу өҫтөндә, йөҙөп барғанда

**ПЛА́ВАНИЕ** и **ПЛА́ВАНЬЕ** *с см.* **пла́вать**; **да́льнее пла́вание** алыҫҡа йөҙөп йөрөү

**ПЛА́ВАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йөҙөү ...ы, **пла́вательный бассе́йн** йөҙөү бассейны

**ПЛА́ВАТЬ** *несов.* **1.** йөҙөү, йөҙөп йөрөү; **пла́вать в ре́чке** йылғала йөҙөп йөрөү **2.** батмау, йөҙөп йөрөү; **в воде́ пла́вает де́рево** ағас һыуҙа йөҙөп йөрөй **3.** *разг.* (*служить на судне*) хеҙмәт итеү (*пароходта*) **4.** *перен.*, *разг.* һай йөҙөү, һөйләй алмау, аҙ белеү, буталыу; **пла́вать на экза́мене** имтиханда аҙ белеү ♦ **ме́лко пла́вать** һай йөҙөү, теше батмау (үтмәү)

**ПЛАВИ́ЛЬНИК** *м*; *тех.* плавильник (*металл иретеү приборы*)

**ПЛАВИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* иретеү ...ы; **плави́льный цех** иретеү цехы

**ПЛАВИ́ЛЬНЯ** *ж*; *тех.* иретеү бинаһы

**ПЛАВИ́ЛЬЩИК** *м* иретеүсе (*эшсе*)

**ПЛА́ВИТЬ** *несов. что* иретеү; **пла́вить мета́лл** металл иретеү

**ПЛА́ВИТЬСЯ** *несов.* **1.** иреү; **о́лово в огне́ пла́вится** аҡ ҡурғаш утта ирей **2.** *страд. от* **пла́вить**

**ПЛА́ВКА** *ж* **1.** *см.* **пла́вить**; **пла́вка мета́лла** металл иретеү **2.** иретмә, иретем; **пе́рвая пла́вка чугуна́** суйындың тәүге иретмәһе

**ПЛА́ВКИ** *только мн.* плавка (*һыу ингәндә, ҡыҙынғанда ир-ат кейә торған ҡыҫҡа трусик*)

**ПЛА́ВКИЙ,** -ая, -ое иреүсән, тиҙ ирей торған; **пла́вкий мета́лл** иреүсән металл

**ПЛАВЛЕ́НИЕ** *с см.* **пла́вить, пла́виться**; **темпера́тура плавле́ния** иреү температураһы; **то́чка плавле́ния** иреү нөктәһе

**ПЛА́ВЛЕНЫЙ: пла́вленый сыр** йомшаҡ сыр

**ПЛА́ВНИ** *только мн.* ҡамышлы уйһыу яр

**ПЛАВНИ́К** *м*; *анат.* йөҙгөс, ҡанат; (*жаберный*) елберләк

**ПЛА́ВНОСТЬ** *ж* һалмаҡлыҡ, талғынлыҡ; **пла́вность движе́ний** хәрәкәттәрҙең талғынлығы; **пла́вность ре́чи** телмәрҙең һалмаҡлығы

**ПЛА́ВНЫЙ,** -ая, -ое һалмаҡ, талғын; **пла́вная похо́дка** һалмаҡ йөрөш ♦ **пла́вные согла́сные** *лингв.* талғын тартынҡылар (*“р”, “л” өндәре*)

**ПЛАВУНЕ́Ц** *м* йөҙгәләк, һыу ҡуңыҙы

**ПЛАВУ́ЧЕСТЬ** *ж* йөҙөүсәнлек, йөҙә алыу; **плаву́честь су́дна** судноның йөҙөүсәнлеге

**ПЛАВУ́ЧИЙ,** -ая, -ее йөҙмә, йөҙөп йөрөгән; **плаву́чий мая́к** йөҙөп йөрөгән маяҡ; **плаву́чее расте́ние** йөҙөп үҫкән үҫемлек

**ПЛАГИА́Т** *м* плагиат (*кеше яҙған әҫәрҙе үҙенеке итеп күрһәтеү, үҙләштереү*)

**ПЛАГИА́ТОР** *м* плагиатсы, әҙәбиәт ҡарағы (буры)

**ПЛАГИА́ТОРСТВО** *с* плагиатлыҡ, әҙәби ҡараҡлыҡ (бурлыҡ)

**ПЛА́ЗМА** *ж*; *биол., спец.* плазма

**ПЛАЗМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *биол.* плазма ...ы; **плазмати́ческие кле́тки** плазма күҙәнәктәре

**ПЛА́ЗМЕННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* **1.** плазма ...ы; **пла́зменное состоя́ние** плазма хәле **2.** плазмалы, плазмаға ҡоролған; **пла́зменная ре́зка** плазмалы киҫеү; **пла́зменная металлурги́я** плазмаға ҡоролған металлургия

**ПЛА́КАЛЬЩИК** *м* и **ПЛА́КАЛЬЩИЦА** *ж* (яллանған) илаусы (*ҡайһы бер халыҡтарҙа, мәйет оҙатыу йолаһында, илап барыу өсөн ялланған кеше*)

**ПЛАКА́Т** *м* плакат; **вы́весить плака́т** плакат элеү

**ПЛАКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое плакат ...ы; **плака́тная мастерска́я** плакат оҫтаханаһы

**ПЛА́КАТЬ** *несов.*; *прям., перен.* илау, һыҡтау, йәш түгеү, балауыҙ һығыу; **го́рько пла́кать** һығылып илау; **пла́кать навзры́д** үкһеп илау; **жа́лобно пла́кала скри́пка** әрнетеп скрипка иланы ♦ **пла́кали де́нежки** аҡсаһы елгә осто, аҡсаһынан ҡолаҡ ҡаҡты; **хоть плачь** ултыр ҙа ила инде, илаһаң да булмай

**ПЛА́КАТЬСЯ** *несов. на кого-что, с союзом “что” и без доп.*; *разг.* зарланыу, һыҡраныу, илау; **пла́каться на свою́ судьбу́** үҙ яҙмышыңдан зарланыу ♦ **пла́каться в жиле́тку** *ирон.* меҫкенләнеү, бәхетһеҙлектән зарланыу

**ПЛА́КСА** *м* и *ж*; *разг.* илаҡ, һытыҡ (*кеше*)

**ПЛАКСИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** илаҡ, илап барыусан (барған), илаусан; **плакси́вый ребёнок** илаҡ бала **2.** иламһыраған, иларға торған кеүек; **плакси́вый го́лос** иламһыраған тауыш

**ПЛАКУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** *см.* **плакси́вый**; **плаку́чий ребёнок** илаҡ бала **2.** (*о деревьях и кустарниках*) тәлгәш, бөҙрә; **плаку́чая и́ва** бөҙрә тал

**ПЛАМЕНЕ́ТЬ** *несов.* ялҡынланыу, ҡыҙарып (балҡып) күренеү; **пламене́ет вече́рняя заря́** киске шәфәҡ ҡыҙарып күренә

**ПЛА́МЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ялҡынланып (балҡып) торған, уттай ҡыҙыл; **пла́менный зака́т** ялҡынланып торған шәфәҡ **2.** *перен.* (*пылкий*) ялҡынлы, ҡайнар; **пла́менная речь** ялҡынлы телмәр; **пла́менный приве́т** ялҡынлы сәләм

**ПЛА́МЯ** *с*; *прям., перен.* ялҡын; **пла́мя свечи́** шәм ялҡыны; **пла́мя гне́ва** асыу ялҡыны

**ПЛАН** *м*; *в разн. знач.* план; **план го́рода** ҡаланың планы; **план зда́ния** йорттоң планы; **план экономи́ческого разви́тия** иҡтисади үҫеш планы; **план уро́ка** дәрес планы; **пере́дний план** алғы план; **актёр комеди́йного пла́на** комик пландағы актёр; **соста́вить план** план төҙөү; **дать лицо́ кру́пным пла́ном** йөҙҙө ҙур планда биреү (күрһәтеү); **обсуди́ть вопро́с в теорети́ческом пла́не** мәсьәләне теоретик планда тикшереү

**ПЛАНЁР** и **ПЛА́НЕР** *м* планёр, планер (*моторһыҙ оса торған ҡанатлы аппарат*)

**ПЛАНЕРИ́ЗМ** *м* планеризм (*планёрҙа осоу оҫталығы*)

**ПЛАНЕРИ́СТ** *м* планёрсы (*планёрҙа осоусы*)

**ПЛАНЁРНЫЙ** и **ПЛА́НЕРНЫЙ,** -ая, -ое планёр ...ы; **планёрный спорт** планёр спорты

**ПЛАНЕ́ТА** *ж* планета; **больши́е плане́ты** эре (ҙур) планеталар; **ма́лые плане́ты** ваҡ (бәләкәй) планеталар

**ПЛАНЕТА́РИЙ** *м* планетарий (**1.** *планеталарҙың һәм башҡа күк есемдәренең хәрәкәтен күрһәтә торған аппарат* **2.** *шул аппарат ярҙамында планеталар хәрәкәтен күрһәтә торған бина*)

**ПЛАНЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое планета(лар) ...ы; **плане́тная систе́ма** планеталар системаһы

**ПЛАНИМЕ́ТРИЯ** *ж* планиметрия (*геометрияның яҫылыҡтағы фигураларҙы өйрәнә торған бүлеге*)

**ПЛАНИ́РОВАНИЕ I** *с см.* **плани́ровать** I; **плани́рование го́рода** ҡаланы планлаштырыу

**ПЛАНИ́РОВАНИЕ II** *с см.* **плани́ровать** II

**ПЛАНИ́РОВАТЬ I** и **ПЛАНИРОВА́ТЬ** *несов. что*; *в разн. знач.* планлаштырыу; **плани́ровать зда́ние** бинаны планлаштырыу; **плани́ровать перестро́йку** *чего-л.* *нимәнелер* үҙгәртеп төҙөүҙе планлаштырыу; **плани́ровать экспеди́цию на ию́нь** экспедицияны июнгә планлаштырыу

**ПЛАНИ́РОВАТЬ II** *несов.* аҡрынлап түбәнәйеү, һалмаҡ ҡына түбәнәйә барыу (төшөү); **самолёт плани́рует** самолёт аҡрынлап түбәнәйә

**ПЛАНИРО́ВКА** *ж см.* **плани́ровать** I; **планиро́вка рабо́т** эштәрҙе планлаштырыу

**ПЛАНИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое планлаштырыу ...ы; **планиро́вочные рабо́ты** планлаштырыу эштәре

**ПЛА́НКА** *ж* планка, йоҡа тар таҡта ♦ **прице́льная пла́нка** тоҫҡау планкаһы

**ПЛАНКТО́Н** *м*; *биол.* планктон (*һыуҙа йәшәп, ағым менән күсеп йөрөгән үҫемлектәр һәм тереклектәр*)

**ПЛАНОВИ́К** *м* плановик (*производствола эш планы төҙөү белгесе*)

**ПЛА́НОВОСТЬ** *ж* планлылыҡ (*планға нигеҙләнгән булыу*) **пла́новость хозя́йства** хужалыҡтың планлылығы

**ПЛА́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** план ...ы; **пла́новый расчёт** план иҫәбе; **пла́новый отде́л** план бүлеге **2.** планлы; **пла́новое строи́тельство** планлы төҙөлөш

**ПЛАНОМЕ́РНОСТЬ** *ж* планлылыҡ, планлы рәүештә булыу; **планоме́рность в рабо́те** эштәге планлылыҡ

**ПЛАНОМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое планлы рәүештә, план буйынса эш итә торған; **планоме́рное преобразова́ние приро́ды** тәбиғәтте планлы рәүештә үҙгәртеп ҡороу

**ПЛАНТА́ТОР** *м* плантатор (*плантация хужаһы*)

**ПЛАНТА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое плантатор(ҙар) ...ы; **планта́торские владе́ния** плантатор биләмәләре

**ПЛАНТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое плантация ...ы; **плантацио́нное хозя́йство** плантация хужалығы; **плантацио́нный чай** плантация сәйе

**ПЛАНТА́ЦИЯ** *ж* плантация (**1.** *берәй махсус үҫемлек үҫтереү менән шөғөлләнгән хужалыҡ* **2.** *нәмәләр сәселгән ҙур майҙан*); **свеклови́чные планта́ции** сөгөлдөр плантациялары; **ча́йные планта́ции** сәй плантациялары

**ПЛАНШЕ́Т** *м* планшет (**1.** *карта һалып йөрөү өсөн тышы үтә күренмәле итеп эшләнгән яҫы сумка* **2.** *геод. ерҙең планын төшөрөү өсөн ҡағыҙ йәбештереп яһалған таҡта* **3.** *геод. планға һыҙылған геодезия күсермәһе*)

**ПЛАНШЕ́ТКА** *ж*; *спец.*, *разг. см.* **планше́т** 1, 2

**ПЛАСТ** *м*; *прям.*, *перен.* ҡатлау, ҡатлам; **у́гольный пласт** күмер ҡатламы; **пласт по́чвы** тупраҡ ҡатламы; **ра́зные пласты́ населе́ния** халыҡтың төрлө ҡатламдары ♦ **пласто́м лежа́ть** ләж ятыу, һинһыҙ булып ятыу

**ПЛАСТА́ТЬ** *несов.* **1.** *что*; *разг.* ҡатлаулау, ҡатламдарға айырыу; **пласта́ть дёрн** кәҫте ҡатламдарға айырыу **2.** *кого*; *спец.* (*разделывать рыбу*) ярып таҙартыу

**ПЛА́СТИКА** *ж* пластика (**1.** *һынлы һүрәт яһау сәнғәте* **2.** *ритмик тән хәрәкәте яһау оҫталығы* **3.** *һындағы, хәрәкәттәге матурлыҡ, нәфислек*)

**ПЛАСТИКА́Т** *м* пластикат (*пластик массаның һығылмалы төрө*)

**ПЛА́СТИКОВЫЙ,** -ая, -ое пластик; **пла́стиковая плёнка** пластик плёнка

**ПЛАСТИЛИ́Н** *м* пластилин; **де́лать игру́шки из пластили́на** пластилиндан уйынсыҡтар яһау

**ПЛАСТИЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** пластилин ...ы; **пластили́новый цех** пластилин цехы **2.** пластилин, пластилиндан яһалған; **пластили́новые фигу́рки звере́й** пластилиндан яһалған йәнлек һындары

**ПЛАСТИ́НА** *ж* пластина; **желе́зная пласти́на** тимер пластина; **деревя́нная пласти́на** ағас пластина

**ПЛАСТИ́НКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **пласти́на** **2.** *в разн. знач.* пластинка; **долгоигра́ющая пласти́нка** оҙаҡ уйнала торған (уйналмалы) пластинка; **прояви́ть пласти́нку** *фото.* пластинканы асығайтыу

**ПЛАСТИ́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое пластинкалы, пластинка рәүешендәге (һымаҡ); **пласти́нчатые грибы́** *бот.* пластинкалы бәшмәктәр

**ПЛАСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** пластик, һығылмалы, пластика ...ы; **иску́сство пласти́ческого изображе́ния** пластик һынлау оҫталығы; **пласти́ческая гимна́стика** пластик гимнастика; **пласти́ческий та́нец** һығылмалы бейеү **2.** пластик, үҙле, һынмай торған, ыуалмаусан; **пласти́ческая ма́сса** пластик масса (*һығылмалы, яһалма полимер материал*) **3.** *мед.* пластик; **пласти́ческая опера́ция** пластик операция

**ПЛАСТИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** һығылмалылыҡ, нәфислек; **пласти́чность движе́ний** хәрәкәттәрҙең һығылмалылығы **2.** үҙлелек, йомшаҡлыҡ, ыуалмаусанлыҡ; **пласти́чность раскалённого желе́за** ҡыҙҙырылған тимерҙең үҙлелеге

**ПЛАСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һығылмалы, нәфис, һалмаҡ; **пласти́чный та́нец** һалмаҡ бейеү **2.** *см.* **пласти́ческий** 2

**ПЛАСТМА́ССА** *ж* пластмасса; **изде́лия из пластма́ссы** пластмассанан эшләнгән әйберҙәр

**ПЛАСТМА́ССОВЫЙ,** -ая, -ое пластмасса, пластмассанан эшләнгән; **пластма́ссовая посу́да** пластмассанан эшләнгән һауыт-һаба

**ПЛАСТОВА́ТЬ** *несов.*; *разг.*, *спец. см.* **пласта́ть**

**ПЛАСТОВО́Й,** -ая, -ое ҡатлаулы, ҡатлы-ҡатлы хәлдәге; **пластова́я го́рная поро́да** ҡатлаулы тау тоҡомо; **пластово́й у́голь** ҡатлаулы күмер

**ПЛА́СТЫРЬ** *м* пластырь; **положи́ть на ра́ну пла́стырь** яраға пластырь йәбештереү

**ПЛА́ТА** *ж* хаҡ, түләм, бәйә, әжер, түләү; **входна́я пла́та** инеү хаҡы; **за́работная пла́та** эш

хаҡы; **подённая пла́та** көнлөк түләү; **повы́сить пла́ту** бәйәһен арттырыу

**ПЛАТА́Н** *м* платан (*ағас*)

**ПЛАТЁЖ** *м* **1.** *см.* **плати́ть 2.** (*сумма*) түләү, түләнә торған (тейешле) аҡса; **взыска́ние платеже́й** тейешле аҡсаны түләтеү; **кру́пные платежи́** ҙур түләүҙәр ♦ **нало́женный платёж** *см.* **нало́женный**

**ПЛАТЁЖЕСПОСО́БНОСТЬ** *ж* түләй алыу, түләй алыу һәләте; **платёжеспосо́бность ба́нка** банкының түләй алыу һәләте

**ПЛАТЁЖЕСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое түләй ала торған, түләүгә һәләтле булған; **платёжеспосо́бное предприя́тие** түләүгә һәләтле булған предприятие

**ПЛАТЁЖНЫЙ,** -ая, -ое түләү ...ы; **платёжная ве́домость** түләү ведомосы; **платёжные сро́ки** түләү сроктары

**ПЛА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күлдәк ...ы; **пла́тельные пу́говицы** күлдәк һиҙәптәре **2.** күлдәклек; **пла́тельная ткань** күлдәклек туҡыма

**ПЛАТЕ́ЛЬЩИК** *м* и **ПЛАТЕ́ЛЬЩИЦА** *ж* түләүсе; **плате́льщик нало́гов** һалым түләүсе

**ПЛА́ТИНА** *ж* ағалтын, платина

**ПЛАТИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *тех.* ағалтын йүгертеү

**ПЛАТИНИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **платини́ровать**

**ПЛА́ТИНОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ағалтын (платина) ...ы; **пла́тиновая руда́** ағалтын рудаһы **2.** (*сделанный из платины*) ағалтын, платина; **пла́тиновая посу́да** ағалтын һауыт-һаба

**ПЛАТИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что, чем* и *без доп.* түләү; **плати́ть зо́лотом** алтынлата түләү; **плати́ть за услу́ги** хеҙмәт күрһәткән өсөн түләү; **плати́ть долги́** бурыс(ты) түләү **2.** *чем* түләү, ҡайтарыу, яуап биреү; **плати́ть добро́м за добро́** изгелеккә изгелек менән яуап биреү

**ПЛА́ТНЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* түләүле, түләнә торған, хаҡ менән (булған); **пла́тное лече́ние** түләүле дауалау; **пла́тное обслу́живание** түләүле хеҙмәт; **пла́тная до́лжность** түләүле вазифа

**ПЛАТО́** *с нескл.* яйла, яҫы таулыҡ

**ПЛАТО́К** *м* яулыҡ; **кружевно́й плато́к** селтәрле яулыҡ; **завяза́ть плато́к** яулыҡ бәйләү

**ПЛАТОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** енси хистәр ҡатнашмаған, саф, рухи, платоник; **платони́ческая любо́вь** саф мөхәббәт **2.** (*отвлечённый*) тормошсан булмаған, тормоштан ситләшкән (тормошҡа ашмаҫтай); **платони́ческие мечты́** тормошсан булмаған хыялдар

**ПЛАТО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яулыҡ ...ы; **плато́чная бахрома́** яулыҡ сәсәге **2.** яулыҡлыҡ; **плато́чный материа́л** яулыҡлыҡ туҡыма

**ПЛАТФО́РМА** *ж*; *в разн. знач.* платформа; **грузова́я платфо́рма** йөк платформаһы; **избира́тельная платфо́рма па́ртии** фирҡәнең һайлау платформаһы; **по́езд останови́лся у платфо́рмы** поезд платформа янында туҡтаны; **грузи́ть маши́ны на платфо́рмы** машиналарҙы платформаларға тейәү

**ПЛА́ТЬЕ** *с* **1.** *собир.* (*одежда, носимая поверх белья*) өҫ кейеме, кейем; **мужско́е пла́тье** ирҙәр кейеме **2.** (*женская одежда*) күлдәк; **шёлковое пла́тье** ебәк күлдәк

**ПЛАТЬЕВО́Й,** -ая, -ое күлдәклек; **платьевы́е тка́ни** күлдәклек туҡымалар

**ПЛАТЯНО́Й,** -ая, -ое кейем ...ы, өҫ кейеме ...ы; **платяно́й шкаф** кейем шкафы; **платяна́я щётка** өҫ кейеме щёткаһы

**ПЛАУ́Н** *м* көкөрт үләне

**ПЛАФО́Н** *м* плафон (*аҫылмалы электр лампаһы абажуры*)

**ПЛА́ХА** *ж* **1.** ярҡа (*урталай ярылған бүрәнә, түмәр*) **2.** йәллат түмәре; **умере́ть на пла́хе** йәллат түмәрендә үлеү

**ПЛАЦ** *м*; *воен.* плац (*өйрәнеү һәм парад майҙаны*)

**ПЛАЦДА́РМ** *м* плацдарм (**1.** *хәрби операция әҙерләнә һәм башҡарыла торған арауыҡ* **2.** *хәрби хәрәкәт башлау өсөн сығанаҡ булыр ер*)

**ПЛАЦЕ́НТА** *ж*; *анат.* (*у женщин*) һуңғылыҡ, бала ятҡыһы; (*у самок животных*) сүп, сыу, сыуын

**ПЛАЦКА́РТА** *ж* плацкарт (*вагонда урын күрһәтеп бирелгән өҫтәмә билет*)

**ПЛАЦКА́РТНЫЙ,** -ая, -ое плацкартлы; **плацка́ртный биле́т** плацкартлы билет; **плацка́ртное ме́сто** плацкартлы урын

**ПЛАЧ** *м* **1.** *см.* **пла́кать**; **гро́мкий плач** ҡысҡырып илау **2.** (*обрядовая песня*) сеңләү, зарлау; **слага́ть плач** зарлы йыр сығарыу ♦ **плач расте́ний** *бот.* һабағы йәрәхәтләнгәндә үҫемлектәрҙең һут сығарыуы

**ПЛАЧЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*жалобный*) ҡыҙғаныс, көйөнөслө, иларлыҡ, йән әрнеткес; **плаче́вный го́лос** иламһыраған тауыш **2.** (*жалкий*) алама, аяныс, насар, хөрт; **плаче́вный результа́т** насар һөҙөмтә; **плаче́вное состоя́ние** аяныс хәл

**ПЛА́ЧУЩИЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **пла́кать 2.** *прил.* иламһыраған; **пла́чущий го́лос** иламһыраған тауыш

**ПЛА́ШКА** *ж* **1.** (*деревянная пластинка*) яҫы ағас таҡта **2.** (*ловушка*) ҡамас **3.** (*инструмент для нанесения резьбы на металлические винты, болты и т.п.*) плашка

**ПЛАШМЯ́** *нареч.* йәйенке (яҫы) яғы менән; **уда́рить ша́шкой плашмя́** ҡылыстың яҫы яғы менән һуғыу ♦ **упа́сть плашмя́** йөҙ түбән (салҡан) йығылыу

**ПЛАЩ** *м* плащ; **накры́ться плащо́м** плащ ябыныу

**ПЛАЩЕВО́Й,** -ая, -ое плащлыҡ; **плащева́я ткань** плащлыҡ туҡыма

**ПЛАЩ-ПАЛА́ТКА** *ж* плащ-палатка

**ПЛЕБЕ́Й** *м* плебей (**1.** *тар. Боронғо Римда иң түбән ҡатлам вәкиле* **2.** *түбән ҡатлам кешеһе*)

**ПЛЕБИСЦИ́Т** *м* плебисцит (**1.** *тар. Боронғо Римда плебейҙар йыйылышында ҡабул ителә торған ҡарар* **2.** *бөтә халыҡ тауышын йыйыу сараһы*); **провести́ плебисци́т** плебисцит үткәреү

**ПЛЕВА́** *ж*; *спец.* яры, пәрҙә (*хайуан йәки үҫемлек организмында*)

**ПЛЕВА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* төкөрөк һауыты

**ПЛЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** төкөрөү **2.** *на кого-что*; *перен.*, *прост.* төкөрөү, төкөрөп ҡарау; **плева́ть на замеча́ния** иҫкәртмәләргә төкөрөп ҡарау ♦ **плева́ть в потоло́к** түшәмгә төкөрөп ятыу, (эшһеҙ) бот күтәреп ятыу

**ПЛЕВА́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* төкөрөнөү, төкөрөү

**ПЛЕ́ВЕЛ** *м* тиле үлән, тиле бойҙай

**ПЛЕВО́К** *м* төкөрөк ♦ **плевка́ не сто́ит** *прост.* төкөргән төкөрөккә лә тормай

**ПЛЕ́ВРА** *ж*; *анат.* үпкә ярыһы, плевра

**ПЛЕВРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* плевра ...ы, үпкә ярыһы ...ы; **плевра́льная по́лость** үпкә ярыһы ҡыуышлығы

**ПЛЕВРИ́Т** *м*; *мед.* плеврит (*үпкә ярыһының шешеүе*)

**ПЛЕД** *м* плед (*ҡалын ҙур шәл*)

**ПЛЕМЕННО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡәбилә ...ы; **племенно́й сою́з** ҡәбилә берләшмәһе **2.** нәҫел (тоҡом) ...ы; **племенно́й бык** нәҫел үгеҙе **3.** тоҡом (нәҫел) малы ...ы; **племенно́е хозя́йство** тоҡом малы хужалығы

**ПЛЕ́МЯ** *с* **1.** ҡәбилә, ҡәүем; **кочевы́е племена́** күсмә ҡәбиләләр **2.** *высок.* тоҡом, быуын, зат; **э́то на́ше пле́мя** был беҙҙең зат **3.** *уст.* халыҡ, милләт ♦ **на пле́мя** *с.-х.* нәҫелгә, нәҫел алыу (үрсетеү) өсөн

**ПЛЕМЯ́ННИК** *м* эне, ир туған (*бер туғандың улы*); **племя́нница** *ж* һеңле, ҡыҙ туған (*бер туғандың ҡыҙы*)

**ПЛЕН** *м*; *прям.*, *перен.* тотҡонлоҡ, әсирлек; **взять в плен** әсирлеккә алыу; **быть в плену́** тотҡонлоҡта булыу; **в плену́ предрассу́дков** хөрәфәттәр тотҡонлоғонда

**ПЛЕНА́РНЫЙ,** -ая, -ое пленар, ғөмүми; **плена́рное заседа́ние** пленар ултырыш

**ПЛЕНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һоҡландырғыс, ғәжәп матур, таң (хайран) ҡалдырырлыҡ; **плени́тельная красота́** һоҡландырғыс матурлыҡ; **плени́тельный го́лос** ғәжәп матур тауыш

**ПЛЕНИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *книжн.* әсирлеккә төшөрөү; **плени́ть солда́т проти́вника** дошман һалдаттарын әсирлеккә төшөрөү **2.** *чем*; *перен.* һоҡландырыу, таң ҡалдырыу, күңелде биләп алыу, әсир итеү; **плени́ть красото́й** матурлыҡ менән әсир итеү

**ПЛЕНИ́ТЬСЯ** *сов. кем-чем* һоҡланыу, таң ҡалыу, әсир булыу; **плени́ться красото́й** матурлығына таң ҡалыу

**ПЛЁНКА** *ж* **1.** яры, шекәрә, ҡаҫмаҡ; **плёнка желтка́** йомортҡа һарыһының ярыһы; **плёнка льда** боҙ шекәрәһе **2.** *фото.*, *кино.* плёнка; **цветна́я плёнка** төҫлө плёнка; **конце́рт в за́писи на плёнку** плёнкаға яҙылған концерт

**ПЛЕ́ННИК** *м* и **ПЛЕ́ННИЦА** *ж* әсир, тотҡон

**ПЛЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** әсирҙәге, тотҡондағы, әсиргә (тотҡонға) эләккән **2.** *в знач. сущ.* **пле́нный** *м* и **пле́нная** *ж* тотҡон

**ПЛЁНОЧНЫЙ,** -ая, -ое плёнка, плёнкалы; **плёночная тепли́ца** плёнка теплица ♦ **плёночный фотоаппара́т** плёнкалы фотоаппарат

**ПЛЕ́НУМ** *м* пленум; **провести́ пле́нум** пленум үткәреү

**ПЛЁНЧАТЫЙ,** -ая, -ое ярылы, шекәрәле; **плёнчатые ко́льца на но́жке гриба́** бәшмәк һабағындағы ярылы дүңгәләктәр

**ПЛЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **плени́ть**

**ПЛЕНЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **плени́ться**

**ПЛЁС** *м* плёс, ятыу; **глубина́ плёса** ятыуҙың тәрәнлеге

**ПЛЕ́СЕННЫЙ,** -ая, -ое үңәҙле, күк ...ы, күгәргән; **пле́сенный за́пах** күк еҫе

**ПЛЕ́СЕНЬ** *ж* үңәҙ, күк

**ПЛЕСК** *м* сапылдау, супылдау, сәпелдәү, шапылдау; **плеск волн** тулҡындар сапылдауы

**ПЛЕСКА́НИЕ** *с см.* **плеска́ть**, **плеска́ться**

**ПЛЕСКА́ТЬ** *несов.* **1.** сапылдау, супылдау, сәпелдәү, шапылдау; **во́лны пле́щут о бе́рег** тулҡындар ярға бәрелеп сапылдай **2.** сапылдатыу, супылдатыу, шапылдатыу; **плеска́ть вёслами по воде́** ишкәк менән һыуҙы сапылдатыу **3.** *на кого-что*, *чем* сәсрәтеү; **плеска́ть водо́й в лицо́** биткә һыу сәсрәтеү **4.** *что* и *без доп.* сайпылдырыу; **плеска́ть во́ду на́ пол** һыуҙы иҙәнгә сайпылдырыу **5.** (*трепетать — о флагах, парусах и т.п.*) елберләү; **фла́ги пле́щут** әләмдәр елберләй

**ПЛЕСКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **плеска́ть** 1; **2.** (*расплёскиваться*) сайпылыу **3.** (*обдавать брызгами*) (һыу) сәсрәтеү, супырлау; **де́ти пле́щутся в реке́** балалар йылғала супырлай **4.** *см.* **плеска́ть** 5

**ПЛЕ́СНЕВЕТЬ** *несов.* үңәҙләнеү, күгәреү; (*о молочных продуктах*) ҡаҡһыу; **хлеб пле́сневеет от сы́рости** еүешлектән икмәк күгәрә

**ПЛЕСНЕВО́Й,** -ая, -ое үңәҙ ...ы, күк ...ы; **плеснево́й налёт** күк ҡунығы; **плесневы́е грибы́** үңәҙ бәшмәктәре

**ПЛЕСНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **плеска́ть** 1—4; **2.** *что*, *чего*; *разг.* әҙерәк ҡойоу; **плесни́те чайку́** әҙерәк сәй ҡойоғоҙ

**ПЛЕСТИ́** *несов. что* **1.** үреү, бәйләү; **плести́ корзи́ны** кәрзин үреү; **плести́ кружева́** селтәр бәйләү **2.** *перен.*, *разг.* ҡороу, ҡуптарыу, килтереп сығарыу; **плести́ интри́гу** аҫтыртын эш ҡороу **3.** *перен.*, *разг.* (*говорить что-л. несу-*

*разное*) юҡ-бар һөйләү, сафсата һатыу, уйлап сығарып һөйләү

**ПЛЕСТИ́СЬ** *несов.* **1.** *разг.* һөйрәлеү, һөйрәлеп барыу; **плести́сь по доро́ге** юлда һөйрәлеп барыу **2.** *страд. от* **плести́**

**ПЛЕТЕ́ЛЬЩИК** *м* и **ПЛЕТЕ́ЛЬЩИЦА** *ж* үреүсе, бәйләүсе; **плете́льщик корзи́н** кәрзин үреүсе

**ПЛЕТЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **плести́** **2.** (*способ соединения нитей, стеблей и т.д.*) үрелеү, үреү, бәйләнеү, бәйләү; **кружевно́е плете́ние** селтәрләп бәйләү **3.** (*плетёное изделие*) үрелгән (бәйләнгән) әйбер

**ПЛЕТЁНКА** *ж*; *разг.* **1.** үреп (бәйләп) эшләнгән ситән (*кәрзин һ.б.*) **2.** (*хлеб*) үрмә ҡалас

**ПЛЕТЁНЫЙ,** -ая, -ое үрелгән, бәйләнгән, үрмә; **плетёный по́яс** үрелгән билбау; **плетёная корзи́на** үрелгән кәрзин

**ПЛЕТЕ́НЬ** *м* ситән; **высо́кий плете́нь** бейек ситән; **огороди́ть плетнём** ситән менән уратыу

**ПЛЁТКА** *ж* ҡамсы; **плести́ плётку** ҡамсы үреү

**ПЛЕТНЁВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ситән …ы; **плетнёвые подпо́рки** ситән таяуҙары **2.** ситән, үреп эшләнгән; **плетнёвый мост** ситән күпер (баҫма); **плетнёвый сара́й** ситән һарай

**ПЛЕТЬ** *ж* **1.** ҡамсы; **плеть с темляко́м** бөлдөргәлә ҡамсы **2.** (*ветвь или стебель вьющегося растения*) ян һабаҡ, еле; **плеть клубни́ки** еләк еләһе; **плеть ты́квы** ҡабаҡ еләһе; **пусти́ть плеть** еле ебәреү

**ПЛЕЧЕВО́Й,** -ая, -ое иңбаш (ҡулбаш) …ы; **плечева́я кость** ҡулбаш һөйәге; **плечево́й суста́в** ҡулбаш быуыны

**ПЛЕ́ЧИКО** *с*; *разг.* **1.** *уменьш.-ласк. от* **плечо́** 1; **2.** иңһәлек (*ҡатын-ҡыҙ, балалар өҫ кейемендә иңбашҡа эстән ҡатлап тегелә торған тауар*) **3.** *мн.* **пле́чики** (*вешалка*) кейем элгес, яурынса

**ПЛЕЧИ́СТЫЙ,** -ая, -ое яурынлы, яурынтаҡ, иңсәр; **плечи́стый па́рень** яурынтаҡ егет

**ПЛЕЧО́** *с* **1.** *анат.* ҡулбаш, иңбаш, яурын, иң; **худы́е пле́чи** ҡаҡса яурын; **пожима́ть плеча́ми** иңбаштарҙы һикертеп ҡуйыу **2.** *тех.* иңбаш, көйәнтә (*һалмауырҙың тирәк нөктәһенән көс төшкән нөктәгә тиклемге өлөшө*) ♦ **вы́нести (вы́везти) на свои́х плеча́х** үҙ иңеңдә алып барыу, бер үҙең үтәп сығыу; **за плеча́ми быть (стоя́ть, име́ть и т.п.)**: 1) үткәндә, уҙғанда (булыу, тороу); 2) яҡында булыу (тороу); **на пле́чи взвали́ть (переложи́ть и т.п.)** елкәһенә йөкмәтеү (һалыу); **по плечу́** *кому* көс етә, хәлдән килә (*эшкә ҡарата*); **с чужо́го плеча́** (*об одежде*) кеше кейеме, кешенән ҡалған кейем; **с плеч доло́й** өҫтән йөк төштө; **с плеч сбро́сить (стряхну́ть, свали́ть и т.п.)** иңдән алып ташлау, тамам ҡотолоу; **плечо́ к плечу́**; **плечо́м к плечу́**; **плечо́ в плечо́**: 1) иңгә иң терәп, йәнәш; 2) берҙәм рәүештә, бергә

**ПЛЕШИ́ВЕТЬ** *несов.* ялтасланыу, пеләшләнеү

**ПЛЕШИ́ВОСТЬ** *ж* ялтаслыҡ, пеләшлек

**ПЛЕШИ́ВЫЙ,** -ая, -ое ялтас, таҡыр, пеләш; **плеши́вая голова́** ялтас баш

**ПЛЕШИ́НА** *ж* **1.** (*на шерсти, мехе*) ялтас (йөнө ҡырылған) урын **2.** (*место, лишённое растительности*) таҡыр (ҡаҡ, яланғас) ер (урын) **3.** (*лысина*) ялтас, пеләш, таҡыр, ҡаҡбаш

**ПЛЕШЬ** *ж см.* **плеши́на**

**ПЛЕЯ́ДА** *ж*; *книжн.* плеяда, арҙаҡлы төркөм (*бер осорҙа бер өлкәлә эшләгән кешеләр*)

**ПЛИ** *межд.*; *воен.* (*команда*) пли, ат

**ПЛИ́НТУС** *м* плинтус (*стена буйлатып иҙәнгә ҡағылған өс ҡырлы тар планка*)

**ПЛИС** *м* плис (*эре ептән бәрхәткә оҡшатып, өбөрәләп һуҡҡан туҡыма*)

**ПЛИ́СОВЫЙ,** -ая, -ое плис; **пли́совые шарова́ры** плис салбар

**ПЛИССЕ́** *с нескл.* **1.** плиссе (*материяға махсус эшләнгән буй-буй һыр*); **сде́лать плиссе́ на ша́рфе** шарфҡа плиссе яһау (эшләү), шарфты плисселау **2.** *в знач. прил.* плиссе; **ю́бка плиссе́** плиссе итәк

**ПЛИССИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **плиссирова́ть** **2.** *прил.* плисселы; **плиссиро́ванные обо́рки** плисселы итәк

**ПЛИССИРОВА́ТЬ** *несов. что* плисселау, плисселы итеү, плиссе эшләү (яһау); **плиссирова́ть ю́бку** итәккә плиссе яһау

**ПЛИССИРОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **плиссирова́ть**

**ПЛИССИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **плиссирова́ть** **2.** *см.* **плиссе́** 1

**ПЛИТА́** *ж*; *в разн. знач.* плита; **мра́морная плита́** мәрмәр плита; **га́зовая плита́** газ плитаһы

**ПЛИ́ТКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **плита́** **2.** *в разн. знач.* плитка; **пли́тка шокола́да** бер плитка шоколад; **гото́вить на пли́тке** плиткала бешереү

**ПЛИТНЯ́К** *м* ҡатламлы (плиткалы) таш; **огра́да из плитняка́** плиткалы таштан эшләнгән ҡойма

**ПЛИ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** плита …ы; **пли́точный заво́д** плита заводы **2.** таҡта, плитка, таҡта рәүешендәге, плиткалы; **пли́точный пол** плитка иҙән; **пли́точный чай** таҡта сәй

**ПЛОВ** *м* былау; **гото́вить плов** былау бешереү

**ПЛОВЕ́Ц** *м* **1.** йөҙөүсе; **соревнова́ние пловцо́в** йөҙөүселәр ярышы **2.** диңгеҙҙә (оло һыуҙарҙа) йөҙөп хеҙмәт итеүсе

**ПЛОВЧИ́ХА** *ж* йөҙөүсе

**ПЛОД** *м* **1.** емеш, орлоҡ; **съедо́бные плоды́** ашауға яраҡлы емештәр **2.** (*зародыш*) яралғы, түл, ҡарындағы бала **3.** *чего*; *перен.* емеш, һөҙөмтә; **плоды́ многоле́тнего труда́** күп йыллыҡ хеҙмәт емештәре

**ПЛОДИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** тыуҙырыу, үрсетеү; **плоди́ть ове́ц** һарыҡ үрсетеү **2.** *перен.* тыуҙырыу, барлыҡҡа килтереү, арттырыу; **плоди́ть себе́ враго́в** үҙеңә дошман арттырыу

**ПЛОДИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* үрсеү, артыу, күбәйеү, ишәйеү; **кро́лики бы́стро плодя́тся** йорт ҡуяндары тиҙ үрсей

**ПЛО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*оплодотворённый*) аталанған; **пло́дное яйцо́** аталанған йомортҡа **2.** (*плодоносный*) емеш биргән (бирә торған); **пло́дная ви́шня** емеш биргән сейә

**ПЛОДОВИ́ТОСТЬ** *ж* **1.** емешлелек, емеште мул биреү, мул емешле булыу; **плодови́тость расте́ния** үҫемлектең мул емешле булыуы **2.** (*способность быстро размножаться*) үрсемлелек, үрсеүсәнлек, түллелек **3.** *перен.* ижади емешлелек, ижади әүҙемлек, күп ижад итеүсәнлек, күп ижад итеү; **плодови́тость писа́теля** яҙыусының ижади әүҙемлеге

**ПЛОДОВИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о растениях*) емешле; (*о людях, животных*) үрсемле, түлле, тиҙ үрсеүсән; **кро́лики плодови́ты** йорт ҡуяндары тиҙ үрсеүсән **2.** *перен.* ижады емешле, ижады әүҙем; **плодови́тый писа́тель** ижады емешле яҙыусы

**ПЛОДОВО́ДСТВО** *с* емешселек, емеш үҫтереүселек

**ПЛОДОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое емешселек ...ы, емеш үҫтереү(селек) ...ы; **плодово́дческая брига́да** емеш үҫтереү бригадаһы

**ПЛОДО́ВЫЙ,** -ая, -ое емеш ...ы; **плодо́вые дере́вья** емеш ағастары; **плодо́вые консе́рвы** емеш консервалары

**ПЛОДОЖО́РКА** *ж* алма күбәләге

**ПЛОДОНО́ЖКА** *ж*; *бот.* емеш һабағы

**ПЛОДОНОСИ́ТЬ** *несов.* емеш биреү (бирә алыу)

**ПЛОДОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое емеш биргән (бирә торған); **плодоно́сные расте́ния** емеш бирә торған үҫемлектәр

**ПЛОДОНОШЕ́НИЕ** *с см.* **плодоноси́ть**

**ПЛОДООВОЩНО́Й,** -ая, -ое йәшелсә-емеш ...ы; **плодоовощно́е хозя́йство** йәшелсә-емеш хужалығы; **плодоовощно́й магази́н** йәшелсә-емеш магазины

**ПЛОДОРО́ДИЕ** *с* уңдырыш, уңдырышлылыҡ; **плодоро́дие по́чвы** тупраҡтың уңдырышлылығы

**ПЛОДОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое уңдырышлы; **плодоро́дная земля́** уңдырышлы ер

**ПЛОДОСБО́Р** *м* емеш йыйыу

**ПЛОДОТВО́РНОСТЬ** *ж* һөҙөмтәлелек, уңышлылыҡ, уңышлы (һөҙөмтәле) булыу

**ПЛОДОТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое һөҙөмтәле, уңышлы; **плодотво́рный труд** һөҙөмтәле хеҙмәт

**ПЛОДОХРАНИ́ЛИЩЕ** *с* емеш һаҡлау урыны

**ПЛОДОЯ́ГОДНЫЙ,** -ая, -ое емеш-еләк ...ы; **плодоя́годное вино́** емеш-еләк шарабы; **плодоя́годные консе́рвы** емеш-еләк консервалары

**ПЛО́МБА** *ж*; *в разн. знач.* пломба; **наложи́ть пло́мбу на дверь** ишеккә пломба һалыу; **положи́ть пло́мбу в дупло́ зу́ба** теш ҡыуышына пломба һалыу

**ПЛОМБИ́Р** *м* пломбир (*туңдырма төрө*)

**ПЛОМБИРОВА́НИЕ** *с см.* **пломбирова́ть**

**ПЛОМБИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **пломбирова́ть 2.** *прил.* пломбалы; **пломбиро́ванные зу́бы** пломбалы тештәр

**ПЛОМБИРОВА́ТЬ** *несов. что*; *в разн. знач.* пломбалау; **пломбирова́ть ваго́н** вагонды пломбалау; **пломбирова́ть зу́бы** тештәрҙе пломбалау

**ПЛОМБИРОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **пломбирова́ть**

**ПЛОМБИРО́ВКА** *ж см.* **пломбирова́ть**

**ПЛО́СКИЙ,** -ая, -ое **1.** яҫы, ялпаҡ; **пло́ская кры́ша** яҫы түбә; **пло́ский лоб** яҫы маңлай; **пло́ский нос** ялпаҡ танау **2.** (*менее высокий, глубокий и т.п., чем обычно — о вещах*) яҫы, ялпаҡ; (*о посуде*) йәйпәк, йәйенке; **пло́ская посу́да** йәйпәк һауыт **3.** *перен.* (*банальный, пошлый*) тупаҫ, тапалған, ҡыҙыҡһыҙ; **пло́ская шу́тка** тупаҫ шаяртыу

**ПЛОСКОГО́РЬЕ** *с* яҫы таулыҡ, яйла

**ПЛОСКОГРУ́ДЫЙ,** -ая, -ое яҫы күкрәкле

**ПЛОСКОГУ́БЦЫ** *только мн.* ҡарғаморон, ҡыпсыуыр

**ПЛОСКОДО́НКА** *ж* яҫы төплө (күкрәкһеҙ) кәмә

**ПЛОСКОСТО́ПИЕ** *с*; *мед.* яҫы табанлылыҡ

**ПЛО́СКОСТЬ** *ж* **1.** *мат.* яҫылыҡ; **пересече́ние плоскосте́й** яҫылыҡтарҙың киҫешеүе **2.** *перен.* ҡараш нөктәһе, күҙлек, йүнәлеш; **рассмотре́ть вопро́с в друго́й пло́скости** мәсьәләне икенсе күҙлектән ҡарау **3.** *ав.* (*крыло самолёта*) самолёт ҡанаты ♦ **кати́ться по накло́нной пло́скости** түбәнгә тәгәрәү, түбән төшөү (*әхлаҡи яҡтан боҙолоу*)

**ПЛОТ** *м* һал; **связа́ть плот** һал бәйләү; **спуска́ть плот** һал төшөрөү; **сплав плото́в** һал ағыҙыу

**ПЛОТВА́** *ж* сабаҡ (*балыҡ*)

**ПЛОТИ́НА** *ж* быуа, плотина; **бето́нная плоти́на** бетон быуа; **плоти́на со шлю́зами** шлюзлы плотина

**ПЛОТИ́ТЬ** *несов. что*; *спец.* һаллау; **плоти́ть брёвна** бүрәнә һаллау

**ПЛОТИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **плоти́ть**

**ПЛО́ТНИК** *м* балта оҫтаһы

**ПЛО́ТНИЧАТЬ** *несов.* балта оҫтаһы булып эшләү, балта эшендә эшләү

**ПЛО́ТНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое балта оҫтаһы ...ы, балта оҫталығы ...ы; **пло́тническое ремесло́** балта оҫтаһы һөнәре; **пло́тнический инструме́нт** балта оҫталығы ҡорамалы



3 зак. 2.0007.06

**ПЛО́ТНИЧЕСТВО** *с* балта оҫталығы; **обучи́ться пло́тничеству** балта оҫталығына өйрәнеү

**ПЛО́ТНИЧИЙ,** -ья, -ье балта оҫтаһы ...ы; **пло́тничья арте́ль** балта оҫталары артеле; **пло́тничье де́ло** балта оҫтаһы эше

**ПЛО́ТНИЧНЫЙ,** -ая, -ое балта оҫталығы ...ы, балта ...ы; **пло́тничные рабо́ты** балта эштәре

**ПЛО́ТНО** *нареч.* **1.** тығыҙ, тығыҙлап, тығыҙ итеп; **пло́тно утрамбова́ть грунт** ерҙе тығыҙлап төйөү **2.** (*вплотную*) терәп, ныҡ яҡын килтереп (ҡыҫып); **приста́вить шкаф пло́тно к стене́** шкафты стенаға терәп үк ҡуйыу **3.** (*наглухо*) ныҡ итеп, нығытып, еткерә; **пло́тно закры́ть дверь** ишекте еткерә ябыу **4.** *разг.* (*сытно*) ныҡ, бик яҡшылап, туйғансы; **пло́тно пое́сть** бик яҡшылап ашап алыу

**ПЛО́ТНОСТЬ** *ж* **1.** бешелек, ныҡлыҡ, тығыҙлыҡ; **пло́тность тка́ни** туҡыманың бешелеге **2.** *физ.* тығыҙлыҡ; **едини́ца пло́тности** тығыҙлыҡ берәмеге **3.** *спец.* тығыҙлыҡ, ҡуйылыҡ; **пло́тность артиллери́йского огня́** артиллерия утының тығыҙлығы; **пло́тность населе́ния** халыҡтың тығыҙлығы

**ПЛО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тығыҙ, ҡуйы; **пло́тная ма́сса** ҡуйы масса; **пло́тный дым** ҡуйы төтөн **2.** ҡалын, тығыҙ, беше; **пло́тная ткань** беше туҡыма **3.** йыш, ҡуйы, тығыҙ; **пло́тный забо́р** йыш ҡойма; **пло́тный оре́шник** ҡуйы сәтләүеклек **4.** (*крепко сложенный*) мыҡты, баҙыҡ, тос, тығыҙ тәнле; **пло́тный мужчи́на** мыҡты ир **5.** *разг.* (*сытный*) туҡлыҡлы, ныҡлы, төйөрөм; **пло́тный обе́д** туҡлыҡлы төшкө аш

**ПЛОТОВЩИ́К** *м* һалсы (*һал һаллаусы*)

**ПЛОТОГО́Н** *м* һал ағыҙыусы

**ПЛОТОЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йыртҡыс (*ит менән туйыныусы*); **плотоя́дный зверь** йыртҡыс януар **2.** *перен.* хайуани (енси) теләкле, аҙғын; **плотоя́дный взгляд** енси теләкле ҡараш

**ПЛОТЬ** *ж*; *уст.* тән, кәүҙә ♦ **плоть и кровь** *чья*; **плоть от пло́ти** *чьей* үҙ ҡаны, үҙ балаһы

**ПЛО́ХО 1.** *нареч.* насар, яман, алама; **пло́хо обраща́ться** *с кем-л. берәйһе менән* насар мөғәмәлә итеү **2.** *кому, с кем-чем в знач. сказ., безл.* насар, ауыр; **ему́ пло́хо** уның хәле ауыр; **бы́ло пло́хо с рабо́чими** эшселәр менән ҡыйынлыҡтар булды **3.** *в знач. сущ.* **пло́хо** *с нескл.* насар билдәһе, икеле билдәһе; **получи́ть пло́хо** насар билдәһе алыу ♦ **пло́хо лежи́т** күренеп (күҙ алдында) ята, йыйып ҡуйылмаған; **ко́нчить пло́хо** *см.* **ко́нчить**; **из рук вон пло́хо** *см.* **рука́**

**ПЛОХО́Й,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* ҡыйын(лыҡ), насар, яман, әшәке, алама, хөрт, мөшкөл; **плоха́я пого́да** алама көн; **плохи́е усло́вия** насар шарттар; **плохо́й организа́тор** насар ойоштороусы; **плохо́е утеше́ние** насар йыуаныс; **плохо́й челове́к** алама кеше; **плоха́я оде́жда** алама кейем; **плоха́я привы́чка** алама ғәҙәт **2.** (*неблагоприятный, не предвещающий хорошего*) хәүефле, ҡурҡыныслы, шомло, яҡшы түгел; **плохо́е предчу́вствие** хәүефле һиҙенеү; **плохи́е ана́лизы** анализдар яҡшы түгел **3.** *в знач. сущ.* **плохо́е** *с* хәүеф, ҡурҡыныс **4.** (*больной*) насар, алама; **плохо́е се́рдце** йөрәк насар **5.** *в кратк. ф.* (*в тяжёлом состоянии*) көсһөҙ, (хәлдәр) мөшкөл; **он был плох** уның хәле мөшкөл ♦ **шу́тки пло́хи** *с кем-чем кем-нимә менән* шаярып булмай; **из рук вон плохо́й** *см.* **рука́**

**ПЛО́ШКА** *ж* **1.** *прост.* йәйпәк (*һауыт*) **2.** (*сосуд с салом и т.п. для освещения*) шәм һауыты

**ПЛОЩА́ДКА** *ж* **1.** *в разн. знач.* майҙансыҡ; **спорти́вная площа́дка** спорт майҙансығы; **строи́тельная площа́дка** төҙөлөш майҙансығы; **сцени́ческая площа́дка** сәхнә майҙансығы **2.** (*часть вагона*) өләш; **пере́дняя площа́дка трамва́я** трамвайҙың алғы өләше

**ПЛОЩАДНО́Й,** -ая, -ое тупаҫ, әҙәпһеҙ, хаяһыҙ; **площадна́я брань** тупаҫ һүгенеү

**ПЛО́ЩАДЬ** *ж*; *в разн. знач.* майҙан; **Кра́сная пло́щадь** Ҡыҙыл майҙан; **посевна́я пло́щадь** сәсеү майҙаны; **жила́я пло́щадь** торлаҡ майҙаны; **пло́щадь треуго́льника** *мат.* өсмөйөштөң майҙаны

**ПЛУГ** *м* һабан; **однолеме́шный плуг** бер төрәнле һабан

**ПЛУГА́РЬ** *м* һабансы (*һабан һөрөүсе*)

**ПЛУГОВО́Й,** -ая, -ое һабан ...ы, һабан менән; **плугова́я обрабо́тка земли́** ерҙе һабан менән эшкәртеү

**ПЛУТ** *м* **1.** (*обманщик*) алдар, алдаҡсы, ялғансы **2.** (*хитрец*) хәйләкәр, хәйлә токсайы, мут; (*в игре*) хәрәмсе

**ПЛУТА́ТЬ** *несов.*; *разг.* аҙашып йөрөү; **плута́ть в лесу́** урманда аҙашып йөрөү

**ПЛУ́ТНИ** *мн.* (*ед.* **плу́тня** *ж*); *разг.* хәйлә, хәйләле эш, мутлыҡ

**ПЛУТОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое мут, хәйләле; **плутова́тый челове́к** мут кеше; **плутова́тый взгляд** хәйләле ҡараш

**ПЛУТОВА́ТЬ** *несов.* мутлашыу, хәйләләү, алдау, хәрәмләшеү; **плутова́ть при игре́ в ка́рты** кәрт уйынында хәрәмләшеү

**ПЛУТОВСКО́Й,** -ая, -ое **1.** ялғансыларға (алдаҡсыларға) хас; **плутовски́е приёмы** алдаҡсыларға хас алымдар **2.** (*выражающий плутовство*) мутлыҡты (хәйләне) сағылдырған, мут, хәйләкәр; **плутовско́й взгляд** мут ҡараш

**ПЛУТОВСТВО́** *с* **1.** (*обман*) алдыҡ **2.** (*хитрость*) мутлыҡ, хәйләкәрлек

**ПЛУТОКРА́Т** *м*; *книжн.* плутократ (*хакимлыҡ итеүсе синыфтың иң бай, юғары ҡатлам вәкиле*)

**ПЛУТОКРА́ТИЯ** *ж*; *книжн.* плутократия (*иң бай, юғары ҡатлам вәкилдәренең хакимлығына нигеҙләнгән сәйәси ҡоролош*)

**ПЛЫВУ́Н** *м* туйын (*тупраҡ аҫтындағы һыулы ҡатлам; урынынан ҡуҙғалып китерлек һыуға бай тупраҡ ҡатламы*)

**ПЛЫТЬ** *несов.* **1.** йөҙөү, йөҙөп барыу (йөрөү); **плыть на спине́** салҡан йөҙөү; **плыть про́тив тече́ния** ағымға ҡаршы йөҙөү **2.** ағыу, ағып барыу (килеү, китеү); **по реке́ плыву́т брёвна** йылғанан бүрәнәләр ағып бара **3.** барыу, йөҙөү; **плыть на парохо́де** пароходта барыу **4.** *перен.* йөҙөү, ағылыу; **луна́ плывёт по не́бу** күктә ай йөҙә; **ту́чи плыву́т** болоттар ағыла **5.** (*представляться взору движущимся*) йөҙгәндәй булып күренеү, һалмаҡ ҡына алға барыу

**ПЛЮГА́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг.*, *презр.* меҫкен ҡиәфәтле, килбәтһеҙ, шыҡһыҙ, ҡойто

**ПЛЮ́НУТЬ** *сов. см.* **плева́ть** ♦ **раз плю́нуть** *кому* бер ни тормай, ап-анһат эшләүе (башҡарыуы)

**ПЛЮРАЛИ́ЗМ** *м* плюрализм, күп төрлөлөк; **плюрали́зм мне́ний** фекерҙәр төрлөлөгө

**ПЛЮРАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое плюралистик, күп төрлө; **плюралисти́ческое мировоззре́ние** донъяға плюралистик ҡараш

**ПЛЮС** *м* **1.** *мат.* (*знак*) плюс, ҡушыу билдәһе **2.** *нескл.*; *мат.* ҡушыу, плюс; **два плюс три равня́ется пяти́** икегә өстө ҡушһаң, биш була **3.** *нескл.* (*при указании на температуру выше нуля*) плюс; **сего́дня плюс пятна́дцать (гра́дусов)** бөгөн плюс ун биш (градус) **4.** *перен.*, *разг.* өҫтөнлөк, плюс, артыҡлыҡ; **э́тот прое́кт име́ет мно́го плю́сов** был проекттың өҫтөнлөктәре күп **5.** плюслы; **получи́ть пять с плю́сом** плюслы биш алыу

**ПЛЮСНА́** *ж*; *анат.* табан (*табандың ҡыҫәнән бармаҡтарға тиклемге өлөшө*)

**ПЛЮСНЕВО́Й,** -ая, -ое *анат.* табан ...ы; **плюсневы́е ко́сти** табан һөйәктәре

**ПЛЮ́ХАТЬСЯ** *несов. см.* **плю́хнуться**

**ПЛЮ́ХНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* лап (шап) итеп барып төшөү, лап (шап) итеп ултырыу (йығылыу); **плю́хнуться на стул** ултырғысҡа лап итеп ултырыу

**ПЛЮШ** *м* плюш, хәтфә; **обши́ть дива́н плю́шем** диванды хәтфә менән тышлау

**ПЛЮ́ШЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** хәтфә, плюш, хәтфә ...ы, плюш ...ы; **плю́шевое произво́дство** хәтфә етештереү(се) **2.** плюш, хәтфә, хәтфә (плюш) менән тышланған, хәтфәнән (плюштан) эшләнгән; **плю́шевый воротни́к** хәтфә яға; **плю́шевая ме́бель** хәтфә менән тышланған мебель

**ПЛЮ́ШКА** *ж* күмәс; **печь плю́шки** күмәс бешереү

**ПЛЮЩ** *м* сырмауыҡ, үрмәле гөл

**ПЛЮ́ЩИТЬ** *несов. что* яҫыртыу, ялпайтыу, йәйпәкләү, йәмшәйтеү; **плю́щить желе́зо** тимерҙе (сүкеп) йәйпәкләү

**ПЛЯЖ** *м* пляж, һыу инеү; **морско́й пляж** диңгеҙ пляжы; **песча́ный пляж** ҡомло һыу инеү урыны

**ПЛЯ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое һыу инеү ...ы, пляж ...ы; **пля́жный костю́м** һыу инеү костюмы

**ПЛЯС** *м*; *разг. см.* **плясать**; **пусти́ться в пляс** бейергә төшөү

**ПЛЯСА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* бейеү; **плясать вприся́дку** сүгәләп бейеү **2.** *перен.* бейешеү; **бу́квы пля́шут пе́ред глаза́ми** хәрефтәр күҙ алдында бейешә ♦ **плясать пе́ред** *кем берәйһе* алдында бейеп тороу (*ялағайланыу*); **плясать под ду́дку** *чью см.* **ду́дка**

**ПЛЯ́СКА** *ж* **1.** *см.* **плясать 2.** (*танец*) бейеү; **анса́мбль пе́сни и пля́ски** йыр һәм бейеү ансамбле

**ПЛЯСОВО́Й,** -ая, -ое **1.** бейеү ...ы; **плясова́я по́за** бейеү позаһы **2.** *в знач. сущ.* **плясова́я** *ж* бейеү көйө; **заигра́ли плясову́ю** бейеү көйөн уйнап ебәрҙеләр

**ПЛЯСУ́Н** *м* и *уст.* **ПЛЯСУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* (оҫта) бейеүсе

**ПНЕВМА́ТИКА** *ж* пневматика (*ҡыҫылған һауа менән хәрәкәткә килтерелә торған механизмдар, ҡулайламалар*)

**ПНЕВМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое пневматик; **пневмати́ческое ору́жие** пневматик ҡорал; **пневмати́ческий насо́с** пневматик насос

**ПНЕВМОНИ́Я** *м*; *мед.* пневмония, үпкә шешеүе

**ПНУТЬ** *сов. см.* **пина́ть**

**ПО** *предлог* **1.** *с дат. п.* (*при обозначении предмета, места, на поверхности которого происходит или на которое направлено действие*) -дан/-дән, -ға/-гә, буйлап; **гла́дить по голове́** баштан һыйпау; **идти́ по у́лице** урамдан барыу, урам буйлап барыу; **разложи́ть кни́ги по столу́** китаптарҙы өҫтәлгә таратып ташлау

**2.** *с дат. п.* (*при обозначении места, предмета, в границах которого происходит действие*) -ла/-лә, буйлап; **ходи́ть по ко́мнате** бүлмәлә йөрөү; **гуля́ть по са́ду** баҡсала йөрөү; **путеше́ствовать по стране́** ил буйлап сәйәхәт итеү

**3.** *с дат. п.* (*при обозначении предмета, по направлению к которому совершается действие*) ыңғайына, -дан/-дән; **гла́дить по ше́рсти** йөндөң ыңғайына һыпырыу; **идти́ по ве́тру** ел ыңғайына барыу; **идти́ по сле́ду зве́ря** йәнлектең эҙенән барыу; **плыть по тече́нию** ағым ыңғайына йөҙөү

**4.** *с дат. п.* (*при указании на то, в соответствии с чем, согласно чему совершается действие*) -ға/-гә, буйынса, нигеҙендә, менән; **жить по пра́вде** дөрөҫлөк менән йәшәү; **уе́хать по сове́ту враче́й** табиптарҙың кәңәше буйынса китеү; **уво́литься по со́бственному жела́нию** үҙ теләгең менән эштән китеү; **писа́ть по ста́рой орфогра́фии** иҫке орфография буйынса яҙыу; **движе́ние по гра́фику** график буйынса хәрәкәт

**5.** *с дат. п.* (*при указании на основание для действия, состояния*) -ҡа/-кә ҡарап; **суди́ть по**

**вне́шности** тышҡы ҡиәфәткә ҡарап фекер йөрөтөү

**6.** *с дат. п.* (*при обозначении предмета, посредством которого совершается действие*) менән, арҡыры, аша, -дан/-дән; **посла́ть по по́чте** почта менән ебәреү; **говори́ть по телефо́ну** телефондан һөйләшеү; **переда́ть по ра́дио** радио аша тапшырыу

**7.** *с дат. п.* (*при обозначении причины действия*) арҡаһында, сәбәпле; **отсу́тствовать по боле́зни** ауырыу сәбәпле булмау; **ошиби́ться по рассе́янности** хәтерһеҙлек арҡаһында яңылышыу

**8.** *с дат. п.* (*при обозначении цели, области, сферы совершения действия*) буйынса; **рабо́ты по озелене́нию го́рода** ҡаланы йәшелләндереү буйынса эштәр; **иссле́дование по фи́зике** физика буйынса тикшеренеү; **прика́з по шко́ле** мәктәп буйынса приказ; **хло́поты по хозя́йству** хужалыҡ буйынса хәстәрлек

**9.** *с дат. п.* (*при указании на предмет, свойство, состояние, при помощи которых характеризуется кто-что-л.*) буйынса, яғынан; **брат по ма́тери** әсәй яғынан ағай; **учи́тель по профе́ссии** профессияһы буйынса уҡытыусы; **ста́рший по во́зрасту** йәш яғынан өлкәне; **ва́жный по значе́нию** әһәмиәте буйынса мөһим

**10.** *с дат. п.* (*с сущ. во мн. ч. — при указании на ряд однородных предметов, лиц, отрезков времени и т.п., с которыми связано одно и то же действие*) -ға /-гә; **рассади́ть по места́м** урындарға ултыртып сығыу; **разли́ть по стака́нам** стакандарға ҡойоп сығыу; **смотре́ть по сторона́м** тирә-яҡҡа ҡарау; **ходи́ть по теа́трам** театрҙарға йөрөү

**11.** *с дат. п.* (*со словами "скучать", "тосковать", "тоска"; соответствует предлогу "о"*) -ды/-де һағыныу (юҡһыныу); **тоска́ по ро́дине** тыуған илде һағыныу; **соску́читься по де́тям** балаларҙы юҡһыныу

**12.** *с дат. п.* (*при указании количества кого-чего-л.*) -ар/-әр; **в ка́ждой ко́мнате по одному́ окну́** һәр бүлмәлә берәр тәҙрә; **все купи́ли по одно́й кни́ге** бөтәһе лә берәр китап һатып алды; **занима́ться по ча́су в день** көнөнә берәр сәғәт шөғөлләнеү

**13.** *с дат. п.* (*при указании на одно лицо, предмет, которые в результате действия приходятся на кого-что-л. каждое*) -лап/-ләп; **клева́ть по зёрнышку** бөртөкләп сүпләү; **плати́ть по часа́м** сәғәтләп түләү; **расфасова́ть я́блоки по килогра́мму** алманы килограмлап үлсәп төрөү

**14.** *с вин. п.* (*при указании предела, границы действия*) тиклем, ҡәҙәр, -дан/-дән, ала; **стоя́ть по по́яс в воде́** билгә ҡәҙәр һыу эсендә тороу; **снег по коле́но** ҡар тубыҡтан; **прочита́ть с пе́рвой по деся́тую главу́** беренсенән унынсы бүлеккә тиклем уҡыу; **по сей день** ошо көнгә тиклем

**15.** *с вин. п.* (*при указании количества кого-чего-л., которое приходится кому-чему-л. каждому*) -арлап/-әрләп, -шарлап; **по́ два** икешәрләп; **по́ три** өсәрләп; **по четы́ре** дүртәрләп; **по пя́теро** бишәрләп; **по ше́стеро** алтышарлап

**16.** *с предл. п.* (*при обозначении действия, события, после которого что-л. совершается*) -дан/-дән һуң, -ғас/-гәс; **по истече́нии сро́ка** ваҡыты уҙғандан һуң; **по оконча́нии рабо́ты** эш бөткәс

**ПО...** *приставка* **1.** *ҡылым яһағанда ҡулланып, түбәндәгеләрҙе аңлата*: 1) *эш-хәлдең ҡыҫҡа ваҡыт эсендә булыуын, мәҫ.*, **поигра́ть** уйнап алыу, бер аҙ уйнау; **порабо́тать** эшләп алыу; 2) *эш-хәлдең ҡабатланыуын, мәҫ.*, **погля́дывать** ҡараштырыу, ҡарай-ҡарай тороу; **почи́тывать** уҡыштырыу; 3) *эш-хәрәкәттең аҙһытылған дәрәжәлә булыуын, мәҫ.*, **пома́зать** бер аҙ буяу; **поотста́ть** бер аҙ артта ҡалыу; 4) *эш-хәрәкәт менән берәй билдәнең, сифаттың, торощтоң көсәйеүен, мәҫ.*, **повы́сить** арттырыу, көсәйтеү; **пони́зить** кәметеү; 5) *эш-хәрәкәттең бөтә нәмәгә, ергә таралыуын йәки бөтәһен үҙ эсенә алыуын, мәҫ.*, **попря́тать** йәшереп бөтөрөү; **помёрзнуть** туңып бөтөү; 6) *эш-хәрәкәттең башланыуын, мәҫ.*, **побежа́ть** йүгереп китеү; **повести́** алып китеү

**2.** *сифат яһағанда ҡулланып, түбәндәгеләрҙе аңлата*: 1) *һөҙөмтәһе аңлатҡан һүҙҙән һуң булғанды, мәҫ.*, **порефо́рменный** реформанан һуңғы; **посме́ртный** үлгәндән һуң; 2) *һүҙҙең нигеҙе аңлатҡанға ярашлы эшләнгәнлекте, үлсәнгәнлекте, бүленгәнлекте, мәҫ.*, **поголо́вный** баш иҫәбенән; **подво́рный** йорт башынан; **почасово́й** сәғәт иҫәбенән

**3.** *нигеҙ эргәһендә, йәнәшендә булған, урынлашҡанды белдергән сифат, шулай уҡ шуға ярашлы мәғәнәләге исем яһағанда ҡулланыла, мәҫ.*, **пограни́чный** сик буйындағы; **подоро́жный** юл буйындағы; **побере́жье** яр буйы; **помо́рье** диңгеҙ буйы

**4.** *түбәндәге рәүеш төрҙәрен яһағанда ҡулланыла*: 1) *төбәү килештәге исемдәрҙән, мәҫ.*, **пои́стине** ысынлап та; **поутру́** иртәнсәк; 2) *сифаттарҙың ҡыҫҡартылған формаһынан, мәҫ.*, **подо́лгу** оҙаҡ итеп; **потихо́ньку** яйлап; 3) *рәүештәрҙән, мәҫ.*, **повсю́ду** бөтә ерҙә лә; **поны́не** әлегәсә

**5.** *сифат һәм рәүештең сағыштырма дәрәжәһен яһағанда йомшартыу, аҙһытыу мәғәнәһе биреү өсөн ҡулланыла, мәҫ.*, **побо́льше** күберәк; **поме́ньше** әҙерәк; **поста́рше** олораҡ

**ПО-...** *приставка; сифат, зат алмашы менән килеп, рәүеш яһай, мәҫ.*, **по-но́вому** яңыса; **по-хоро́шему** яҡшылап, яҡшы итеп; **по-мо́ему** минеңсә

**ПОБА́ИВАТЬСЯ** *несов. кого-чего* и *с неопр.* ҡурҡыбыраҡ (шөрләберәк) тороу; **поба́иваться ходи́ть по ле́су** урманда йөрөргә шөрләберәк тороу

**ПОБАЛАГУ́РИТЬ** *сов.*; *разг.* мәрәкәләү, мәрәкәләп алыу

**ПОБА́ЛИВАТЬ** *несов.*; *разг.* ауырыбырак (ауырыштырып, ауыртҡылап) тороу; **голова́ поба́ливает** баш ауырыбыраҡ тора

**ПОБАЛОВА́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* шаяртып алыу, бер аҙ шаяртыу

**ПОБАЛОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** шаярып алыу, бер аҙ шаярыу **2.** *чем* үҙ күңеләңде күтәреү, үҙеңде наҙлау

**ПОБАСЁНКА** *ж*; *разг.* **1.** (*забавный рассказ*) көлкөлө хикәйә, мәҙәк, мәрәкә һүҙ **2.** (*выдумка, небылица*) сафсата, буш һүҙ

**ПОБЕ́Г I** *м* ҡасыу, ҡасып китеү; **побе́г из тюрьмы́** төрмәнән ҡасыу

**ПОБЕ́Г II** *м* үренде, шытым; **молоды́е побе́ги** йәш үренделәр

**ПОБЕ́ГАТЬ** *сов.* йүгереп алыу, бер аҙ йүгереү

**ПОБЕГУ́ШКИ: быть на побегу́шках** *разг.*: 1) йомошсо булыу, ваҡ йомошҡа йөрөү; 2) *у кого*; *перен.* йомошсоһо булыу (*берәйһенең әйткән бер йомошона йүгереп тороу*)

**ПОБЕ́ДА** *ж* еңеү, яуланған өҫтөнлөк (уңыш); **спорти́вная побе́да** спорттағы еңеү; **одержа́ть побе́ду над враго́м** дошманды еңеп сығыу ♦ **пи́ррова побе́да** *см.* **пи́рров**

**ПОБЕДИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПОБЕДИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* еңеүсе, еңеп (өҫтөн) сығыусы; **победи́тель спорти́вных состяза́ний** спорт ярыштары еңеүсеһе

**ПОБЕДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прям.*, *перен.* еңеү, еңеп сығыу, өҫтөнлөк алыу, уңыш яулау; **победи́ть врага́** дошманды еңеп сығыу; **победи́ть за́суху** ҡоролоҡто еңеү; **победи́ть страх** ҡурҡыуҙы еңеү

**ПОБЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** еңеү ...ы; **побе́дная пе́снь** еңеү йыры **2.** *см.* **победоно́сный** 3

**ПОБЕДОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** еңеүле, еңеү килтергән, өҫтөнлөк алған; **победоно́сное наступле́ние** еңеү килтергән һөжүм **2.** еңеүсе; **победоно́сные войска́** еңеүсе ғәскәрҙәр **3.** еңгән; **победоно́сный вид** еңгән ҡиәфәт

**ПОБЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** (*начать передвигаться бегом*) йүгереп китеү, йүгерә башлау **2.** (*обратиться в бегство*) ҡасыу, ҡасып китеү **3.** аға башлау, ағып китеү; **с гор побежа́ли ручьи́** тауҙарҙан өйәрҙәр аға башланы

**ПОБЕЖДА́ТЬ** *несов. см.* **победи́ть**

**ПОБЕЛЕ́ТЬ** *сов. см.* **беле́ть** 2

**ПОБЕЛИ́ТЬ** *сов. что* ағартып (аҡлап, бурлап) алыу; **побели́ть потоло́к** түшәмде ағартып алыу

**ПОБЕ́ЛКА** *ж* **1.** *см.* **побели́ть 2.** *разг.* бур (эҙбиз) иҙмәһе

**ПОБЕРЕ́ЖЬЕ** *с* яр буйы; **морско́е побере́жье** диңгеҙ яры буйы

**ПОБЕРЕ́ЧЬ** *сов. кого-что* **1.** (*сохранить, не тратя что-л.*) һаҡлап тороу, күҙ-ҡолаҡ булып тороу, имен-аман хәлдә тотоу **2.** һаҡлау, ҡәҙерләү, ҡайғыртыу, хәстәрлекле булыу, ҡарау; **побере́чь своё здоро́вье** сәләмәтлегеңде һаҡлау

**ПОБЕРЕ́ЧЬСЯ** *сов.* һаҡланыу, хәүефхәтәрҙән үҙеңде ҡурсыу, һаҡ булыу; **врач сове́товал побере́чься** табип һаҡланырға кәңәш бирҙе

**ПОБЕСЕ́ДОВАТЬ** *сов.* әңгәмәләшеп (әңгәмә ҡороп) алыу

**ПОБЕСПОКО́ИТЬ** *сов. кого-что* бер аҙ тынысһыҙлау, тынғыһыҙлау, маҙаһыҙлау, мәшәҡәтләү, борсоу

**ПОБЕСПОКО́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*поволноваться*) бер аҙ тынысһыҙланыу (мәшәҡәтләнеү, борсолоу) **2.** (*проявить заботу о ком-чём-л.*) ҡайғыртыу, хәстәрен күреү, мәшәҡәтләнеү; **побеспоко́иться о де́тях** балалар тураһында ҡайғыртыу

**ПОБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **бить** 1, 5; **2.** *кого-что* (*победить в игре*) еңеү, еңеп сығыу **3.** *кого*; *разг.* (*убить всех*, *многих*) ҡырып һалыу (бөтөрөү) **4.** *что* (*уничтожить посевы*) һуғыу, һуғып китеү; **град поби́л пшени́цу** бойҙайҙы борсаҡ һуҡҡан **5.** *что*; *разг.* (*разбить*) ҡыйратып (ватып) бөтөрөү

**ПОБИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** иҙелеп (йәмшәйеп, йәнселеп) бөтөү; **я́блоки поби́лись** алмалар йәнселеп бөткән **2.** ватылып (ҡырылып) бөтөү; **посу́да поби́лась** һауыт-һаба ватылып бөткән ♦ **поби́ться об закла́д** малға (аҡсаға) бәхәсләшеү, еңешеү

**ПОБЛАГОДАРИ́ТЬ** *сов. см.* **благодари́ть**; **поблагодари́ть за внима́ние** иғтибар өсөн рәхмәт белдереү

**ПОБЛА́ЖКА** *ж*; *разг.* артыҡ үҙһендереү (иркәләү), яҡлау, ҡотортоу; **дава́ть побла́жки** *кому-л. берәйһен* артыҡ ҡотортоп ебәреү

**ПОБЛЕДНЕ́ТЬ** *сов. см.* **бледне́ть**; **побледне́ть внеза́пно** ҡапыл ағарынып китеү

**ПОБЛЁКЛЫЙ** и **ПОБЛЕ́КЛЫЙ,** -ая, -ое шиңеп (һулып) бөткән, төҫһеҙләнгән; **побле́клые цветы́** шиңеп бөткән сәскәләр

**ПОБЛЁКНУТЬ** и **ПОБЛЕ́КНУТЬ** *сов. см.* **блёкнуть**

**ПОБЛЁСКИВАТЬ** и **ПОБЛЕ́СКИВАТЬ** *несов.* йымылдаштырыу, йымылдап ҡуйыу

**ПОБЛИ́ЗОСТИ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* яҡында, тирәлә, яҡын-тирәлә; **побли́зости ни души́** яҡында йән эҫәре юҡ **2.** *предлог с род. п.* тирәһендә; **побли́зости от до́ма** өй тирәһендә

**ПОБО́И** *только мн.* туҡмаҡ, туҡмау, һуғыу; **следы́ побо́ев** һуҡҡан эҙҙәр

**ПОБО́ИЩЕ** *с* **1.** *ист.* (*битва*) ҙур һуғыш, оло яу **2.** *разг.* (*кровавая драка*) ҡанлы һуғыш

**ПОБОЛЕ́ТЬ I** *сов.*; *разг.* (*пробыть некоторое время больным*) ауырып алыу (ятыу); **он боле́л о́коло ме́сяца** ул айға яҡын ауырып алды

**ПОБОЛЕ́ТЬ II** *сов.* (*болеть некоторое время*) ауыртып тороу; **голова́ поболе́ла и прошла́** баш ауыртып торҙо ла үтте

**ПОБОЛТА́ТЬ I** *сов.* **1.** *что*; *разг.* (*размешать*) болғатып алыу (ҡуйыу) **2.** *чем* һелкеткеләп алыу; **поболта́ть нога́ми** аяҡтарҙы һелкеткеләп алыу

**ПОБОЛТА́ТЬ II** *сов.*; *разг.* (*поговорить о чём-л. несерьёзном*) лығырлап (лаҡылдап) алыу

**ПОБО́РНИК** *м* и **ПОБО́РНИЦА** *ж*; *книжн.* яҡлаусы, яҡлап көрәшеүсе; **побо́рник свобо́ды** ирек яҡлап көрәшеүсе

**ПОБОРО́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* еңеү, еңеп (өҫтөн) сығыу; **поборо́ть проти́вника** ҡаршы яҡты еңеү; **поборо́ть всех конкуре́нтов** бөтә конкуренттарҙан өҫтөн сығыу **2.** *что* (*преодолеть*) еңеү, баҫыу; **поборо́ть страх** ҡурҡыуҙы еңеү

**ПОБОРО́ТЬСЯ** *сов.* *с кем-чем-л.* көрәшеү, ҡаршылыҡ күрһәтеү

**ПОБО́РЫ** *мн.* (*ед.* **побо́р** *м*); *уст.* ҙур һалымдар

**ПОБО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** икенсе дәрәжәләге, өҫтәмә; **побо́чный проду́кт произво́дства** етештереүҙең өҫтәмә продукты **2.** *уст.* никахһыҙ тыуған; **побо́чный ребёнок** никахһыҙ тыуған бала

**ПОБОЯ́ТЬСЯ** *сов.* *кого-чего* и *с неопр.* ҡурҡыңҡырап тороу, ҡурҡа төшөү; **побоя́ться сказа́ть пра́вду** дөрөҫөн әйтеп бирергә ҡурҡыңҡырап тороу

**ПОБРАНИ́ТЬ** *сов.* *см.* **брани́ть**

**ПОБРАНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *с кем* и *без доп.* асыуланышып (әрләшеп) алыу **2.** *см.* **брани́ться** 1

**ПОБРАТА́ТЬСЯ** *сов.* *см.* **брата́ться** 1

**ПОБРАТИ́М** *м* туғанлашҡан кеше

**ПОБРЕ́ЗГАТЬ** и **ПОБРЕ́ЗГОВАТЬ** *сов.* *см.* **бре́згать**

**ПОБРЕСТИ́** *сов.* һалмаҡ (ауыр) атлап барыу

**ПОБРИ́ТЬ** *см.* **брить**

**ПОБРИ́ТЬСЯ** *сов.* *см.* **бри́ться** 1

**ПОБРОДИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* йөрөштөрөү, йөрөп килеү

**ПОБРОСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ырғытҡылау, бығаҡтырып (ташлап) бөтөрөү, атып бәреү, теләһә ҡайҙа ташлау; **поброса́ть ве́щи** әйберҙәрҙе бырағтырып бөтөрөү **2.** *кого-что* (*оставить всё, всех*) ташлап китеү (ҡалдырыу)

**ПОБРЫ́ЗГАТЬ** *сов.* **1.** һибәләү, һибәләп алыу, һипкеләү, һипкеләп алыу; **до́ждик побры́згал** ямғыр һибәләп алды **2.** *кого-что*, *на кого-что* и *без доп.* бөркөү, сәсрәтеү; **побры́згать водо́й** һыу бөркөү

**ПОБРЫ́ЗГАТЬСЯ** *сов.* һыу һибешеп (сәсрәтешеп) алыу

**ПОБРЮЗЖА́ТЬ** *сов.*; *разг.* мыжып алыу, бер аҙ мығырлау

**ПОБРЯ́КАТЬ** *сов.*; *разг.* шалтыратып (шылтыратып, сылтыратып, дыңғырлатып) алыу

**ПОБРЯ́КИВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **побря́кивать** **2.** (*звуки*) шалтыраған (шылтыраған, сылтыраған, дыңғырлаған) тауыш

**ПОБРЯ́КИВАТЬ** *несов.*; *разг.* шалтыратҡылау, салтыратҡылау, дыңғырлатҡылау

**ПОБРЯКУ́ШКА** *ж*; *разг.* **1.** (*игрушка*) шалтырауыҡ **2.** *обычно мн.* **побряку́шки**; *перен.* шаҡы-шоҡо, ваҡ-төйәк

**ПОБУДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡуҙғатыусы, уятыусы, мәжбүр итеүсе; **побуди́тельная причи́на** мәжбүр итеүсе сәбәп

**ПОБУДИ́ТЬ I** *сов.* *кого-что*; *разг.* **1.** (*будить некоторое время*) уятып ҡарау **2.** (*разбудить всех, многих*) уятып сығыу

**ПОБУДИ́ТЬ II** *сов.* *кого-что*, *к чему* и *с неопр.* күндереү, теләк уятыу, димләп ризалатыу, сәбәп булыу; **побуди́ть к реши́тельным де́йствиям** ҡәтғи саралар күрергә теләк уятыу

**ПОБУ́ДКА** *ж*; *воен.* уятыу сигналы; **у́тренняя побу́дка** иртәнге уятыу сигналы

**ПОБУЖДА́ТЬ** *несов.* *см.* **побуди́ть** II

**ПОБУЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **побуди́ть** II — **побужда́ть** **2.** теләк, уй, ниәт; **до́брые побужде́ния** изге ниәттәр

**ПОБУРЕ́ТЬ** *сов.* *см.* **буре́ть**

**ПОБЫВА́ТЬ** *сов.* **1.** булғылау, булып (йөрөп, тороп, барып) ҡайтыу; **побыва́ть в родно́м го́роде** тыуған ҡалала булып ҡайтыу; **побыва́ть на Кавка́зе** Кавказда йөрөп ҡайтыу **2.** булыу, ҡатнашыу; **побыва́ть в похо́де** походта булыу **3.** булыу; **успе́ть побыва́ть в о́тпуске** ялда булырға өлгөрөү

**ПОБЫ́ВКА** *ж*; *разг.* ҡыҫҡа ваҡытлы ял (*күберәк хәрби хеҙмәткәрҙәргә ҡарата*); **прие́хать домо́й на побы́вку** өйгә ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтыу

**ПОБЫ́ТЬ** *сов.* **1.** бер аҙ тороу (тороп китеү); **он по́был до́ма** ул өйҙә тороп китте **2.** *разг.* (*пробыть некоторое время в каком-л. положении*) булып алыу (тороу)

**ПОВА́ДИТЬСЯ** *сов.* *с неопр.*; *разг.* ғәҙәтләнеп (өйрәнеп) китеү (*ғәҙәттә ярамаған эшкә*)

**ПОВА́ДКА** *ж*; *разг.* ғәҙәт, ҡылыҡ; **пова́дка люде́й** кешеләрҙең ҡылығы

**ПОВА́ДНО** **1.** *нареч.* яҡшы, еңел; **вме́сте рабо́тать пова́дно** бергә эшләү еңел **2.** *кому в знач. сказ.*, *безл.* яҡшы, еңел; **с ним пова́дно** уның менән яҡшы ♦ **что́бы не́ было пова́дно** икенсе улай булмаһын (эшләмәһен) өсөн

**ПОВАЛИ́ТЬ I** *сов.* *кого-что* ауҙарыу, ҡолатыу, йығыу, ауҙарып ташлау, йығып һалыу; **повали́ть де́рево** ағасты ауҙарыу; **дождь повали́л хлеба́** ямғыр ашлыҡтарҙы йығып һалған

**ПОВАЛИ́ТЬ II** *сов.*; *разг.* **1.** (*о толпе*) ағыла (ябырыла) башлау; **наро́д повали́л на пло́щадь** халыҡ майҙанға ағыла башланы **2.** (*о дыме, паре*) урғыла (борҡола) башлау; (*о снеге*) баҫып (ишелеп) яуа башлау

**ПОВАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* ауыу, ҡолау, йығылыу, тәгәрәү, ауып китеү, йығылып (тәгәрәп) төшөү

**ПОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое барыһына ла ҡағыла (береһен дә ҡалдырмай) торған, күмәкләп; **пова́льные о́быски** береһен дә ҡалдырмай торған тентеү; **пова́льное увлече́ние** күмәкләп мауығыу

**ПОВАЛЯ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* әүәләү, тәгәр(л)әтеү, әүәләп, тәгәр(л)әтеп алыу; **поваля́ть те́сто в муке́** онда ҡамыр әүәләү

**ПОВАЛЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* аунау, аунап ятыу, **поваля́ться на траве́** үләндә аунап алыу; **поваля́ться на дива́не** диванда аунау

**ПО́ВАР** *м* и *разг.* **ПОВАРИ́ХА** *ж* ашнаҡсы, аш-һыу әҙерләүсе

**ПОВА́РЕННЫЙ,** -ая, -ое аш ...ы, аш-һыу әҙерләү ...ы; **пова́ренная кни́га** аш-һыу әҙерләү китабы; **пова́ренная соль** аш тоҙо

**ПОВАРЁНОК** *м*; *разг.* ашнаҡсы ярҙамсыһы, ашнаҡсы малай

**ПОВАРЁШКА** *ж*; *разг.* (аш) сүмес(е), ижау; **деревя́нная поварёшка** ағас сүмес

**ПОВАРИ́ТЬ** *сов. что* бешереңкерәү, бешерә биреү (төшөү)

**ПОВАРСКО́Й,** -ая, -ое ашнаҡсы ...ы, аш-һыу әҙерләүсе ...ы; **поварско́е иску́сство** аш-һыу әҙерләүсе оҫталығы; **поварско́й нож** ашнаҡсы бысағы

**ПОВЕ́ДАТЬ** *сов. что, о чём* һөйләү, әйтеү, һөйләп (әйтеп) биреү; **пове́дать свою́ та́йну** үҙеңдең эс сереңде һөйләп биреү

**ПОВЕДЕ́НИЕ** *с* тәртип, үҙ-үҙеңде тотош; **приме́рное поведе́ние** өлгөлө тәртип

**ПОВЕЗТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* алып китеү (барыу) (*ат, машина һ.б. тейәп*); **повезти́ ве́щи на вокза́л** әйберҙәрҙе вокзалға алып китеү **2.** *см.* **везти́** 2; **ему́ повезло́** уның эше уңды

**ПОВЕЛЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** *кем-чем* идара итеү, бойороҡ биреп тороу **2.** *см.* **повеле́ть**

**ПОВЕЛЕ́НИЕ** *с* бойороҡ, әмер; **дать повеле́ние** бойороҡ биреү

**ПОВЕЛЕ́ТЬ** *сов. с неопр.* бойороу, әмер биреү

**ПОВЕЛИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПОВЕЛИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* әмир, бойороусы

**ПОВЕЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бойороу ...ы; **говори́ть повели́тельным то́ном** бойороу тауышы менән әйтеү ♦ **повели́тельное наклоне́ние** *грам.* бойороҡ һөйкәлеше

**ПОВЕНЧА́ТЬ** *сов. см.* **венча́ть** 4

**ПОВЕНЧА́ТЬСЯ** *сов. см.* **венча́ться** 2

**ПОВЕРГА́ТЬ** *несов. см.* **пове́ргнуть**

**ПОВЕ́РГНУТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *высок.* (*повалить*) ауҙарыу, йығыу, ҡолатыу **2.** *кого-что, во что* төшөрөү, дусар итеү; **пове́ргнуть в отча́яние** өмөтһеҙлеккә төшөрөү

**ПОВЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **пове́рить** II; **2.** *в знач. сущ.* **пове́ренный** *м* (*официальное лицо*) вәкил **3.** *в знач. сущ.* **пове́ренный** *м* и **пове́ренная** *ж* (*тот* (*та*), *кому поверяют что-л.*) ышаныслы кеше, серҙәш; **избра́ть свои́м пове́ренным** *кого-л.* *берәйһен* үҙеңә серҙәш итеп һайлау

**ПОВЕ́РИТЬ I** *сов. кому-чему, в кого-что* ышаныу, инаныу; **пове́рить в успе́х** уңышҡа ышаныу; **пове́рить слу́хам** имеш-мимештәргә ышаныу; **пове́рить дру́гу** дуҫҡа ышаныу

**ПОВЕ́РИТЬ II** *сов. кому* (*доверяя, сообщить*) ышанып әйтеп (һөйләп) биреү; **пове́рить свою́ та́йну** *кому-л. берәйһенә* ышанып эс сереңде һөйләп биреү

**ПОВЕ́РКА** *ж* **1.** тикшереү, ҡарау; **пове́рка вре́мени** ваҡытты тикшереү **2.** (*перекличка*) барлау, тикшереү; **у́тренняя пове́рка** иртәнге барлау

**ПОВЕРНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* бороу, бороп ҡуйыу, әйләндереү, әйләндереп һалыу; **поверну́ть ключ в замке́** йоҙаҡтағы асҡысты бороу; **поверну́ть больно́го на друго́й бок** ауырыуҙы икенсе яғына әйләндереп һалыу **2.** *кого-что* бороу, бороп ебәреү; **поверну́ть разгово́р на другу́ю те́му** һүҙҙе икенсе темаға бороу **3.** (*свернуть*) боролоу; **поверну́ть за́ угол** мөйөшкә боролоу; **поверну́ть на юг** көньяҡҡа боролоу

**ПОВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** боролоу, әйләнеү; **поверну́ться лицо́м к окну́** йөҙ менән тәҙрәгә боролоу; **поверну́ться на друго́й бок** икенсе яҡҡа әйләнеп ятыу **2.** *перен.* боролоу, үҙгәреү, башҡа төҫ (йүнәлеш) алыу; **де́ло поверну́лось совсе́м ина́че** эш бөтөнләй башҡа төҫ алды

**ПОВЕ́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое тикшереү ...ы, ҡарау ...ы; **пове́рочные рабо́ты** тикшереү эштәре

**ПОВЕРТЕ́ТЬ** *сов. кого-что, кем-чем* борғолау, әйләндергеләү, борғолап (әйләндергеләп) алыу

**ПОВЕРТЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*повращаться*) (бер аҙ) әйләнеү, өйрөләү; **колесо́ поверте́лось и останови́лось** тәгәрмәс бер аҙ әйләнде лә туҡтаны **2.** (*из стороны в сторону*) борғоланып (әйләнгеләп) тороу, ураланыу; **он поверте́лся и ушёл** ул әйләнгеләне лә китеп барҙы

**ПОВЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **поверну́ть**

**ПОВЁРТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **поверну́ться 2.** *страд. от* **повёртывать**

**ПОВЕ́РХ** *предлог с род. п.* **1.** (*на поверхности чего-л., сверху кого-чего-л.*) өҫтөнән, өҫтөнә; **наде́ть плащ пове́рх костю́ма** костюм өҫтөнән плащ кейеү **2.** (*при обозначении предмета, выше которого направлено действие*) өҫтөнән, ашаһынан; **посмотре́ть пове́рх очко́в** күҙлек өҫтөнән ҡарау

**ПОВЕ́РХНОСТНОСТЬ** *ж* өҫтән-мөҫтән генә булыу, һайлыҡ; **пове́рхностность зна́ний** белемдең һайлығы

**ПОВЕ́РХНОСТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** өҫкө, өҫтәге, өҫтә ятҡан; **пове́рхностный слой по́чвы** тупраҡтың өҫкө ҡатламы **2.** *перен.* өҫтән-мөҫтән генә булған, төплө (тәрән) булмаған, һай; **по-**

**ве́рхностные зна́ния** төплө булмаған белем; **пове́рхностное сужде́ние** өҫтән-мөҫтән генә булған фекер

**ПОВЕ́РХНОСТЬ** *ж* **1.** өҫ, йөҙ; **пове́рхность воды́** һыу өҫтө; **пове́рхность земли́** ер йөҙө **2.** *мат.* йөҙө; **пове́рхность ша́ра** шарҙың йөҙө ♦ **лежа́ть на пове́рхности** үҙенән-үҙе билдәле, асыҡ булыу; **скользи́ть по пове́рхности** *чего* өҫтән генә алдыртыу, асылына төшмәү

**ПО́ВЕРХУ** *нареч.*; *разг.* **1.** өҫтән, өҫкө яҡтан; **желе́зо закрепи́ли по́верху** ҡалайҙы өҫтән япҡандар **2.** *перен.* өҫтән генә, өҫтән-мөҫтән, һай; **мы́слит по́верху** һай фекер йөрөтә

**ПОВЕ́РЬЕ** *с* ышаныу, инаныу, хөрәфәт; **стари́нные пове́рья** боронғо ышаныуҙар

**ПОВЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **пове́рить** II

**ПОВЕ́СА** *м*; *уст.* елғыуар

**ПОВЕСЕЛЕ́ТЬ** *сов. см.* **веселе́ть**

**ПОВЕСЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* күңелен асыу (күтәреү); **повесели́ть зри́телей** тамашасыларҙың күңелен асыу

**ПОВЕСЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* күңел асыу (асып алыу)

**ПОВЕ́СИТЬ** *сов. см.* **ве́шать** I; **пове́сить карти́ну** картинаны элеп ҡуйыу

**ПОВЕ́СИТЬСЯ** *сов. см.* **ве́шаться** I 1

**ПОВЕСТВОВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **повествова́ть** **2.** (*рассказ*) хикәйә

**ПОВЕСТВОВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое хикәйә (хикәйәләү) ...ы; **повествова́тельный стиль** хикәйәләү стиле ♦ **повествова́тельное предложе́ние** *грам.* хәбәр һөйләм

**ПОВЕСТВОВА́ТЬ** *несов. о чём* и *без доп.* хикәйәләү, хикәйә итеү, һөйләп (яҙып) биреү

**ПОВЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* (етәкләп, эйәртеп) алып барыу (китеү); **повести́ ребёнка к врачу́** баланы табипҡа алып барыу **2.** *кого-что* алып сығыу, килтереп сығарыу; **тропи́нка повела́ нас к до́му** һуҡмаҡ беҙҙе йорт яғына алып сыҡты **3.** *чем* һикертеү, һелкетеү; **повести́ бровя́ми** ҡаш һикертеү; **повести́ плечо́м** иңбаш һикертеү

**ПОВЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** ғәҙәткә инеп китеү, ғәҙәт булып китеү, шулай булған; **и́здавна так повело́сь** электән үк шулай ғәҙәт булып киткән **2.** *с кем*; *разг.* (*начать дружить*) дуҫлашыу, дуҫлашып китеү ♦ **с кем поведёшься, от того́ и наберёшься** кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың

**ПОВЕ́СТКА** *ж* **1.** саҡырыу ҡағыҙы, повестка; **пове́стка в суд** судҡа повестка **2.** *разг. см.* **пове́стка дня** ♦ **пове́стка дня** көн тәртибе

**ПО́ВЕСТЬ** *ж* повесть; **написа́ть по́весть** повесть яҙыу; **прочита́ть по́весть** повесть уҡыу

**ПОВЕ́ТРИЕ** *с* **1.** *уст.* (*эпидемия*) киҙеү **2.** *перен.*, *разг.* сир (*киң таралған тиҫкәре күренеш йәки йоғошло нәмә*)

**ПОВЕ́ШЕНИЕ** *с* аҫыу, дарға аҫыу; **казнь че́рез пове́шение** дарға аҫыу язаһы

**ПОВЕ́ЯТЬ** *сов.* **1.** (*подуть*) иҫә башлау **2.** *чем обычно безл.*; *прям.*, *перен.* килә (аңҡый) башлау, иҫкә төшөү; **пове́яло весно́й** яҙ еҫе аңҡый башланы

**ПОВЗДО́РИТЬ** *сов. см.* **вздо́рить**

**ПОВЗРОСЛЕ́ТЬ** *сов. см.* **взросле́ть**

**ПОВИВА́ЛЬНЫЙ:** **повива́льная ба́бка** *уст.* кендек әбейе (инәһе)

**ПОВИДА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*пережить*) күпте күреү, кисереү **2.** *кого-что*; *разг.* күреү, күреп сығыу

**ПОВИДА́ТЬСЯ** *сов. с кем* и *без доп.*; *разг.* күрешеү, күреп һөйләшеү

**ПО-ВИ́ДИМОМУ** *вводн. сл.* күрәһең, булһа кәрәк, -ға/-гә оҡшай; **весна́, по-ви́димому, бу́дет ра́нняя** күрәһең, яҙ иртә килер

**ПОВИ́ДЛО** *с* повидло; **я́блочное пови́дло** алма повидлоһы

**ПОВИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **виля́ть** 1

**ПОВИЛИ́КА** *ж* кесерткән ебәге (*үлән*)

**ПОВИЛЯ́ТЬ** *сов.* болғап (һелкеп) ҡуйыу, (бер аҙ) болғап (һелкеп) тороу

**ПОВИНИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **вини́ться**

**ПОВИ́ННОСТЬ** *ж* йөкләмә; **трудова́я пови́нность** хеҙмәт йөкләмәһе

**ПОВИ́ННЫЙ,** -ая, -ое ғәйепле; **он ни в чём не пови́нен** ул бер ҙә ғәйепле түгел ♦ **прийти́ с пови́нной (голово́й)** ғәйепте таныу, ғәйебеңде иҡрар итеү

**ПОВИНОВА́ТЬСЯ** *несов. кому-чему* буйһоноу, һүҙен тыңлау; **повинова́ться прика́зу** приказға буйһоноу; **повинова́ться роди́телям** ата-әсәнең һүҙен тыңлау

**ПОВИНОВЕ́НИЕ** *с* буйһоноу; **беспрекосло́вное повинове́ние** бер һүҙһеҙ буйһоноу; **вы́йти из повинове́ния** буйһоноуҙан сығыу

**ПОВИСА́ТЬ** *несов. см.* **пови́снуть**

**ПОВИСЕ́ТЬ** *сов.* (бер аҙ) аҫылынып (эленеп) тороу

**ПОВИ́СНУТЬ** *сов.* **1.** аҫылыныу, аҫылынып тороу; **пови́снуть на ше́е** муйынға аҫылыныу **2.** һалынып төшөү; **во́лосы пови́сли пря́дями** сәс шәлкемдәре һалынып төшкән ♦ **пови́снуть в во́здухе** һауала аҫылынып ҡалыу (*берәй эштең билдәһеҙлек арҡаһында тормошҡа ашырылмай ятыуы*)

**ПОВЛЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*потянуть за собой*) һөйрәкләп алып китеү (килеү) **2.** *что* (*вызвать как последствие*) килтереп сығарыу, тыуҙырыу; **повле́чь серьёзные осложне́ния** етди ҡыйынлыҡтар килтереп сығарыу

**ПОВЛИЯ́ТЬ** *сов. см.* **влия́ть**

**ПО́ВОД I** *м* теҙген; **натяну́ть по́вод** теҙгенде тартыу ♦ **быть на поводу́** *у кого-л. берәйһенең* ҡурайына бейеү (ихтыярына буйһоноу)

**ПО́ВОД II** *м* сәбәп, һылтау; **без вся́кого по́вода** бер ниндәй сәбәпһеҙ; **по́вод для ссо́ры** ыҙғыш сығыуға сәбәп ♦ **дать по́вод** *кому* сәбәп

булыу; **по по́воду** *кого-чего* хаҡында, тураһында, айҡанлы

**ПОВОДИ́ТЬ I** *сов.* **1.** *кого-что* йөрөткөләү, йөрөтөп алыу (сығыу); **поводи́ть маши́ну** машинаны йөрөтөп алыу **2.** *чем, по чему* йөрөтөү, йөрөтөп алыу; **поводи́ть ука́зкой по ка́рте** күрһәткес таяҡты карта буйлап йөрөтөү

**ПОВОДИ́ТЬ II** *несов. см.* **повести́** 3

**ПОВОДО́К** *м* (*для лошади*) ҡыҫҡа теҙген; (*для собаки*) муйынсаҡлы бау, ҡарғы, муйынсаҡ

**ПОВОДЫ́РЬ** *м* йөрөтөүсе, етәкләп йөрөтөүсе; **поводы́рь слепо́го** һуҡырҙы етәкләп йөрөтөүсе; **соба́ка-поводы́рь** йөрөтөүсе эт

**ПОВОЕВА́ТЬ** *сов.* һуғышыу, һуғышып алыу

**ПОВОЗИ́ТЬ** *сов. кого-что* йөрөтөп алыу, (бер аҙ) ултыртып йөрөтөү, (ташыу, ташып алыу); **повози́ть по го́роду** ҡала буйлап бер аҙ ултыртып йөрөтөү; **повози́ть се́но** бесән ташып алыу

**ПОВОЗИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*поворочаться*) әйләнеп-тулғаныу **2.** (*побаловаться*) ығы-зығы килеү, шаярып (айҡашып, ҡайнашып) алыу; **де́ти повози́лись и усну́ли** балалар шаярып алғандан һуң йоҡлап киттеләр **3.** *с кем-чем* мәшәҡәтләнеү, маташыу, булышыу; **он о́чень люби́л повози́ться с сы́ном** ул улы менән булышырға бик тә ярата торғайны

**ПОВО́ЗКА** *ж* арба, йөк арбаһы

**ПОВО́ЙНИК** *м* повойник (*урыҫ крәҫтиән ҡатындарының боронғо баш кейеме*)

**ПОВОЛО́КА** *ж* шекәрә, томанһыу булып тороу ♦ **глаза́ с поволо́кой** һағышлы күҙҙәр, моңһоу күҙҙәр

**ПОВОЛОЧИ́ТЬ** *сов. см.* **волочи́ть** 1

**ПОВОЛОЧИ́ТЬСЯ** *сов.* һөйрәлеп барыу; **верёвка поволочи́лась по земле́** бау ергә һөйрәлеп бара ине

**ПОВОЛО́ЧЬ** *сов. кого-что*; *разг.* һөйрәп алып китеү

**ПОВОРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **поверну́ть**

**ПОВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **поверну́ться 2.** *страд. от* **повора́чивать**

**ПОВОРОЖИ́ТЬ** *сов.* күрәҙәлек итеү, ноҡот һалыу

**ПОВОРО́Т** *м* **1.** *см.* **поверну́ть — повора́чивать**, **поверну́ться — повора́чиваться 2.** боролма; **поворо́т доро́ги** юл боролмаһы **3.** *перен.* (*перелом*) боролош, һынылыш; **поворо́т де́ла** эштең боролошо

**ПОВОРО́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое өлгөр, етеҙ, сос, еңел һөйәкле; **поворо́тливый челове́к** еңел һөйәкле кеше

**ПОВОРО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*служащий для поворота*) бороу (әйләндереү) ...ы, боролоу (әйләнеү) ...ы **2.** *перен.* (*переломный*) боролош (һынылыш) ...ы; **поворо́тный пункт в разви́тии** *чего-л.* *ниҙеңдер* үҫешендәге боролош пункты

**ПОВОРЧА́ТЬ** *сов.* (*о человеке*) һуҡранып (мығырлап) ҡуйыу (*кешегә ҡарата*); (*о животных*) ырылдап ҡуйыу (*эткә ҡарата*)

**ПОВРЕДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **вреди́ть 2.** *что* имгәтеү, боҙоу, эштән сығарыу, рәтен ебәреү; **повреди́ть но́гу** аяҡты имгәтеү; **повреди́ть замо́к** йоҙаҡты боҙоу

**ПОВРЕЖДА́ТЬ** *несов. см.* **повреди́ть** 2

**ПОВРЕЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **повреди́ть — повреждáть 2.** (*место*) боҙолған (ватылған) урын

**ПОВРЕМЕНИ́ТЬ** *сов. с чем* и *с неопр.*; *разг.* (бер аҙ) көтөү, көтөп (тороп) тороу, кисектереү; **повремени́ть с жени́тьбой** өйләнеүҙе кисектереү; **повремени́ть не́сколько дней** бер нисә көн тороп тороу

**ПОВРЕМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *книжн.* (*периодический*) ваҡытлы; **повреме́нные изда́ния** ваҡытлы баҫмалар **2.** ваҡыт иҫәбенән, ваҡытҡа (ҡарап) иҫәпләнгән; **повреме́нная опла́та** ваҡыт иҫәбенән түләү

**ПОВСЕДНЕ́ВНОСТЬ** *ж* көндәлек тормош

**ПОВСЕДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көндәге, көндәлек, көн дә була торған; **повседне́вные ну́жды населе́ния** халыҡтың көндәлек ихтыяждары **2.** (*обыденный, будничный*) көндәге, ғәҙәттәге, ғәҙәти

**ПОВСЕМЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое бөтә ерҙә лә була торған; **повсеме́стное явле́ние** бөтә ерҙә лә була торған күренеш

**ПОВСКАКА́ТЬ** *сов.*; *разг.* һикерешеп тороу, (бер-бер артлы) тороп баҫыу; **все повскака́ли с мест** барыһы ла урындарынан һикерешеп торҙо

**ПОВСКА́КИВАТЬ** *сов.*; *разг. см.* **повскака́ть**

**ПОВСТА́НЕЦ** *м* баш күтәреүсе

**ПОВСТА́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое баш күтәреүсе(ләр) ...ы; **повста́нческий отря́д** баш күтәреүселәр отряды

**ПОВСТРЕЧА́ТЬ** *сов. см.* **встре́тить** 1

**ПОВСТРЕЧА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **встре́титься**; **он мне повстреча́лся на у́лице** ул миңә урамда осраны

**ПОВСЮ́ДУ** *нареч.* бөтә (һәр, бар) ерҙә, һәр ҡайҙа

**ПОВТОРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **повтори́ть — повторя́ть**, **повтори́ться — повторя́ться 2.** (*слова и т.п., которые повторяются*) ҡабатлау, ҡабатланған урын; **в статье́ есть повторе́ния** мәҡәләлә ҡабатланған урындар бар

**ПОВТОРИ́ТЬ** *сов. что*; *в разн. знач.* ҡабатлау; **повтори́ть пе́сню** йырҙы ҡабатлау; **повтори́ть архитекту́ру ста́рого го́рода** иҫке ҡаланың архитектураһын ҡабатлау; **повтори́ть к экза́мену граммати́ческие пра́вила** имтиханға грамматик ҡағиҙәләрҙе ҡабатлау

**ПОВТОРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡабатланыу; **разгово́р повтори́лся** һөйләшеү ҡабатланды; **оши́бка повтори́лась** хата ҡабатланды **2.** үҙ-үҙен (әйткә-

нен) ҡабатлау; **он повтори́лся** ул әйткәнен ҡабатланы

**ПОВТО́РНЫЙ,** -ая, -ое ҡабат (булған), ҡабаттан (булған), ҡабатланған, икенсе ҡат; **повто́рный медици́нский осмо́тр** икенсе ҡат медицина тикшереүе; **повто́рное объясне́ние** ҡабат аңлатыу; **повто́рный зака́з** ҡабатланған заказ

**ПОВТОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **повтори́ть**

**ПОВТОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **повтори́ться** **2.** *страд. от* **повторя́ть**

**ПОВЫ́СИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*поднять*) күтәреү; **повы́сить у́ровень воды́** һыу кимәлен күтәреү **2.** *что* (*увеличить*) күтәреү, арттырыу; **повы́сить производи́тельность труда́** хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү; **повы́сить продукти́вность скота́** малдың продуктлылығын арттырыу **3.** *что* (*улучшить*) арттырыу, яҡшыртыу, көсәйтеү; **повы́сить ка́чество проду́кции** продукцияның сифатын яҡшыртыу; **повы́сить акти́вность** активлыҡты көсәйтеү **4.** *кого* үрләтеү, күтәреү; **повы́сить по слу́жбе** хеҙмәт буйынса үрләтеү ♦ **повы́сить го́лос (тон)** ҡысҡырып (екереп) әйтеү, асыуҙан ҡысҡырып һөйләй башлау

**ПОВЫ́СИТЬСЯ** *сов.* **1.** күтәрелеү, артыу; **у́ровень воды́ повы́сился** һыуҙың кимәле күтәрелгән **2.** артыу, яҡшырыу; **интере́с к заня́тиям повы́сился** дәрестәргә ҡыҙыҡһыныу артты; **ка́чество проду́кции повы́силось** продукцияның сифаты яҡшырҙы **3.** *в чём* (*в чьём-л. мнении*) үҫеү, дәрәжә күтәрелеү; **повы́ситься в глаза́х люде́й** кешеләр алдында дәрәжә күтәрелеү **4.** *разг.* үрләү, күтәрелеү; **повы́ситься по слу́жбе** хеҙмәт буйынса үрләү

**ПОВЫША́ТЬ** *несов. см.* **повы́сить**

**ПОВЫША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **повы́ситься** **2.** *страд. от* **повыша́ть**

**ПОВЫШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **повы́сить** — **повыша́ть**, **повы́ситься** — **повыша́ться**; **повыше́ние урожа́йности** уңыштың күтәрелеүе; **повыше́ние зарпла́ты** эш хаҡының артыуы **2.** (*возвышение*) ҡалҡыу урын

**ПОВЫ́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **повы́сить** **2.** *прил.* күтәренке, юғары; **повы́шенная температу́ра** юғары температура

**ПОВЯЗА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* бәйләү, бәйләп ҡуйыу; **повяза́ть го́лову платко́м** башҡа яулыҡ бәйләү **2.** бәйләү, тағыу; **повяза́ть га́лстук** галстук тағыу

**ПОВЯЗА́ТЬСЯ** *сов. чем* бәйләү, бәйләп алыу, быуыу; **повяза́ться платко́м** яулыҡ бәйләү; **повяза́ться кушако́м** билбау быуыу

**ПОВЯ́ЗКА** *ж* бәйләмес; **наложи́ть повя́зку на ра́ну** яраға бәйләмес һалыу

**ПОВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **повяза́ть**

**ПОВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **повяза́ться** **2.** *страд. от* **повя́зывать**

**ПОВЯ́НУТЬ** *сов.* шиңеү, һулыу, шиңеп (һулып) бөтөү; **цветы́ повя́ли** сәскәләр шиңеп бөткән

**ПОГАДА́ТЬ** *сов.* күрәҙәлек (бағымсылыҡ) итеп алыу

**ПОГА́НКА** *ж* **1.** *бот.* (*гриб*) ағыулы бәшмәк **2.** *зоол.* (*утка-нырок*) сыпҡай

**ПОГА́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*несъедобный*) ашарға ярамаған, ашамай торған; **пога́ный гриб** ашарға ярамаған (ағыулы) бәшмәк **2.** (*запретный по религиозным соображениям*) хәрәм; **пога́ная пи́ща** хәрәм ризыҡ **3.** *разг.* сүп-сар (йыуынтыҡ) ...ы; **пога́ное ведро́** йыуынтыҡ күнәге **4.** *разг.* (*отвратительный*) хөрт, ерәнес, насар; **пога́ное де́ло** ерәнес эш; **пога́ное настрое́ние** насар кәйеф

**ПОГАСА́ТЬ** *несов. см.* **пога́снуть**

**ПОГАСИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *см.* **гаси́ть** 1, 2; **погаси́ть ла́мпу** шәмде һүндереү **2.** түләү, түләп ҡуйыу (бөтөрөү); **погаси́ть задо́лженность** бирәсәкте түләп ҡуйыу

**ПОГА́СНУТЬ** *сов.*; *прям.*, *перен.* һүнеү, һүнеп бөтөү; **ого́нь пога́с** ут һүнгән; **стра́сти пога́сли** дәрт һүнеп бөткән

**ПОГАША́ТЬ** *несов. см.* **погаси́ть** 2

**ПОГАШЕ́НИЕ** *с см.* **погаси́ть** 2 — **погаша́ть**; **погаше́ние за́йма** заёмды түләү

**ПОГА́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **погаси́ть** **2.** *прил.* түләнгән, түләп бөтөрөлгән (ҡуйылған); **пога́шенная облига́ция** түләнгән облигация

**ПОГИБА́ТЬ** *несов. см.* **поги́бнуть**

**ПОГИ́БЕЛЬ I** *ж*; *уст.* һәләкәт, үлем

**ПОГИ́БЕЛЬ II: согну́ть в три поги́бели**: 1) ныҡ бөгөү; 2) (*смирить*) бишкә бөгөү, буйһондороу; **согну́ться в три поги́бели** ныҡ бөгөлөү

**ПОГИ́БНУТЬ** *сов.*; *прям.*, *перен.* һәләк булыу, һәләкәткә осрау; **дере́вья поги́бли от моро́за** ағастар һыуыҡтан һәләк булды; **поги́бнуть в бою́** һуғышта һәләк булыу; **поги́б весь флот** тотош флот һәләкәткә осраған; **мечты́ поги́бли** хыялдар һәләк булды

**ПОГИ́БШИЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **поги́бнуть** **2.** *прил.* бөткән, эштән (кешелектән) сыҡҡан; **он челове́к поги́бший** ул бөткән кеше

**ПОГЛА́ДИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һыйпау, һыйпап ҡуйыу; **погла́дить по голове́** башынан һыйпап ҡуйыу **2.** *что*; *разг. см.* **вы́гладить**

**ПОГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. кого-что* һыйпаштырыу; **погла́живать бо́роду** һаҡалды һыйпаштырыу

**ПОГЛАЗЕ́ТЬ** *сов.*; *прост.* (ауыҙ асып) ҡарап тороу

**ПОГЛОДА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что, чего* (*погрызть немного*) кимереп алыу **2.** *что* (*сглодать всё, многое*) кимереп ҡуйыу (бөтөрөү)

**ПОГЛОТИ́ТЕЛЬ** *м* йоткос, һеңдергес; **хими́ческий поглоти́тель** химик һеңдергес; **поглоти́тель вла́ги** дым һеңдергес

**ПОГЛОТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* йотоу, һеңдереү, тартыу; **поглоти́ть вла́гу** дым тартыу **2.** *кого-что* (*принять в себя*) йотоу, убыу; **мо́ре поглоти́ло**

**кора́бль** диңгеҙ карапты йотҡан **3.** *кого-что* (*всецело захватить*) бик мауыҡтырыу, мауыҡтырып ебәреү, үҙенә тартыу, зиһенен (күңелен, уйын) биләү; **но́вая иде́я поглоти́ла его́** яңы идея уның уйын биләне **4.** *что* (*взять*) йотоу, талап итеү; **рабо́та поглоти́ла все си́лы** эш бар булған көстө талап итте; **строи́тельство поглоти́ло все де́ньги** төҙөлөш бөтә аҡсаны йотто

**ПОГЛОТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*вобраться*) йотолоу, һеңеү, һеңеп бөтөү **2.** (*увлечься*) ныҡ мауығыу, мауығып китеү

**ПОГЛОЩА́ТЬ** *несов. см.* **поглоти́ть**

**ПОГЛОЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **поглоти́ться 2.** *страд. от* **поглоща́ть**

**ПОГЛОЩЕ́НИЕ** *с см.* **поглоти́ть — поглоща́ть, поглоти́ться — поглоща́ться**; **поглоще́ние вла́ги** дым һеңеү; **поглоще́ние све́та** яҡтылыҡ йотолоу

**ПОГЛУМИ́ТЬСЯ** *сов. над кем-чем* мыҫҡыллау, мәсхәрәләү, мыҫҡыллап (мәсхәрәләп) алыу

**ПОГЛУПЕ́ТЬ** *сов. см.* **глупе́ть**

**ПОГЛЯДЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **гляде́ть** 1, 2; **погляде́ть в окно́** тәҙрәнән ҡарап алыу; **погляде́ть с удивле́нием** ғәжәпһенеп ҡарап ҡуйыу **2.** *за кем-чем*; *разг.* ҡарап (күҙ һалып) тороу, күҙ-ҡолаҡ булыу; **погляде́ть за ребёнком** балаға күҙ-ҡолаҡ булыу

**ПОГЛЯДЕ́ТЬСЯ** *сов.* ҡаранып алыу; **погляде́ться в зе́ркало** көҙгөгә ҡаранып алыу

**ПОГЛЯ́ДЫВАТЬ** *несов.* **1.** ҡараштырғылау, ҡараштырып ҡуйыу, ҡарап алғылау, күҙ һалғылау; **погля́дывать по сторона́м** тирә-яҡҡа күҙ һалғылау **2.** *за кем-чем*; *разг.* ҡараштырғылап (күҙ-ҡолаҡ булып, күҙәткеләп) тороу; **погля́дывать за детьми́** балаларға күҙ-ҡолаҡ булып тороу

**ПОГНА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*насильно послать*) ҡыуып алып китеү; **погна́ть ста́до в по́ле** көтөүҙе ҡырға ҡыуып алып китеү **2.** (*начать гнать*) ҡыуалау, ҡыуа башлау; **погна́ть лошаде́й вскачь** аттарҙы ҡыуалап саптырыу

**ПОГНА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *за кем-чем* (*вдогонку*) ҡыуып китеү (барыу); **погна́ться за за́йцем** ҡуян артынан ҡыуып барыу **2.** *за чем*; *разг.* ынтылыу, ҡыуыу; **погна́ться за сла́вой** дан артынан ҡыуыу

**ПОГНИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* сереү, сереп бөтөү

**ПОГНУ́ТЬ** *сов. что* бөгөү, эйеү, кәкрәйтеү

**ПОГНУ́ТЬСЯ** *сов.* бөгөлөү, эйелеү, кәкрәйеү

**ПОГНУША́ТЬСЯ** *сов. см.* **гнуша́ться**

**ПОГОВА́РИВАТЬ** *несов. о ком-чём* и *с союзом "что"*; *разг.* һөйләнеү, һөйләү, һүҙ сығарыу (ҡуҙғатыу), хәбәр (һүҙ) йөрөү; **он погова́ривает об отъе́зде** ул китеү тураһында һөйләнә

**ПОГОВОРИ́ТЬ** *сов.* һөйләшеп алыу; **поговори́ть о рабо́те** эш тураһында һөйләшеп алыу

**ПОГОВО́РКА** *ж* әйтем; **войти́ в погово́рку** әйтем булып китеү

**ПОГО́ДА** *ж* көн, һауа, һауа торошо; **хоро́шая пого́да** яҡшы көн; **дождли́вая пого́да** ямғырлы көн; **пого́да по́ртится** көн боҙола; **сво́дка пого́ды** һауа торошо тураһында мәғлүмәт ♦ **де́лать пого́ду** хәл итеү, шарт тыуҙырыу

**ПОГОДИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *см.* **повремени́ть 2.** *повел.* **погоди́** тороп (көтөп) тор, сабыр ит; **погоди́, ско́ро приду́** көтөп тор, тиҙҙән киләм ♦ **немно́го погодя́** бер аҙҙан

**ПОГО́ДНЫЙ I,** -ая, -ое йыллыҡ (*йыллап алып барылған*); **пого́дные за́писи** йыллыҡ яҙмалар

**ПОГО́ДНЫЙ II,** -ая, -ое һауа ...ы; **пого́дные усло́вия** һауа шарттары

**ПОГО́ДОК** *м* бер йәшкә кесе (өлкән) бер туған (*һеңле, ҡусты йәки апай, ағай*)

**ПОГО́ЖИЙ,** -ая, -ое яҡшы, аяҙ; **пого́жие дни** аяҙ көндәр

**ПОГОЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (баш) иҫәбенән (иҫәбен); **поголо́вный счёт скота́** мал иҫәбен алыу **2.** (*всеобщий*) тотош, дөйөм; **поголо́вный учёт** дөйөм иҫәп алыу

**ПОГОЛО́ВЬЕ** *с* (баш) иҫәбе (һаны), һан; **ко́нское поголо́вье** аттарҙың һаны

**ПОГОЛОДА́ТЬ** *сов.* асығып алыу, (бер аҙ) аслы-туҡлы тороу

**ПОГОЛУБЕ́ТЬ** *сов.* зәңгәрләнә (күгелйемләнә) төшөү

**ПОГО́ННЫЙ,** -ая, -ое погон (*дөйөм оҙонлоҡҡа һалынған ҹлсәмгә ҡарата*); **пого́нный метр** погон метр

**ПОГО́НЩИК** *м* ҡыуыусы, әйҙәүсе; **пого́нщик коро́в** һыйырҙар ҡыуыусы

**ПОГО́НЯ** *ж* **1.** *за кем-чем* ҡыуа китеү (төшөү, барыу), баҫтырып барыу (килеү) **2.** (*человек или группа людей, преследующие кого-л.*) ҡыуғын; **вы́слать пого́ню** ҡыуғын ебәреү; **организова́ть пого́ню** ҡыуғын ойоштороу **3.** *за чем*; *перен.* ҡыуыу, ынтылыу; **пого́ня за при́былью** табыш артынан ҡыуыу; **пого́ня за сла́вой** дан артынан ҡыуыу

**ПОГОНЯ́ТЬ I** *несов. кого* **1.** ҡыуыу, ҡыуалау; **погоня́ть лошаде́й** аттарҙы ҡыуалау **2.** *перен.*, *разг.* ҡыуыу, ашыҡтырыу; **его́ погоня́ть не прихо́дится** уны ашыҡтырып тораһы юҡ

**ПОГОНЯ́ТЬ II** *сов. кого-что*; *разг.* (*гонять некоторое время*) ҡыуыу, ҡыуып алыу (барыу, йөрөтөү); **погоня́ть мяч** туп ҡыуыу; **погоня́ть коня́** атты ҡыуыу

**ПОГОНЯ́ТЬСЯ** *сов. за кем-чем*; *разг.* ҡыуып йөрөү; **погоня́ться за за́йцем** ҡуян ҡыуып йөрөү

**ПОГОРЕВА́ТЬ** *сов.* ҡайғырып (хәсрәтләнеп, көйөнөп) алыу

**ПОГОРЕ́ЛЕЦ** *м* йорт-ере (мөлкәте) янған кеше, янғындан бөлгән кеше

**ПОГОРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*сгореть целиком*) яныу, янып бөтөү **2.** (*сгнить, сопреть*) яныу, ҡыҙып яныу (күгәреү) **3.** (*засохнуть от зноя*) көйөү,

көйөп (ҡороп) бөтөү; **яровы́е погоре́ли от за́сухи** һабан ашлыҡтар ҡоролоҡтан көйөп бөттө **4.** *разг.* (*лишиться имущества во время пожара*) мөлкәт яныу, янып бөтөү **5.** яна биреү, (бер аҙ) янып тороу; **свеча́ погоре́ла и пога́сла** шәм яна бирҙе лә һүнде **6.** *на чём* и *без доп.*; *перен., прост.* яныу, бәләгә тарыу, ауыҙ бешеү

**ПОГОРЯЧИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡыҙып китеү (алыу); **он зря погорячи́лся** ул юҡҡа ҡыҙып китте

**ПОГО́СТ** *м* ҡәберлек, ауыл зыяраты

**ПОГОСТИ́ТЬ** *сов.* (бер аҙ) ҡунаҡ булыу; **погости́ть дво́е су́ток** ике тәүлек ҡунаҡ булыу

**ПОГРАН...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "сик буйы", "сик буйындағы" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **погранзаста́ва** сик буйы заставаһы

**ПОГРАНИ́ЧНИК** *м* сик һаҡсыһы, пограничник

**ПОГРАНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*указывающий границу*) сик буйы ...ы, сик ...ы; **пограни́чная ли́ния** сик буйы һыҙығы; **пограни́чный знак** сик билдәһе; **пограни́чный столб** сик бағанаһы; **пограни́чные войска́** сик буйы ғәскәрҙәре **2.** (*расположенный на границе*) сик буйындағы; **пограни́чный го́род** сик буйындағы ҡала; **пограни́чный пост** сик буйындағы һаҡ **3.** (*смежный*) сиктәш; **пограни́чные с Башкортоста́ном о́бласти** Башҡортостан менән сиктәш өлкәләр **4.** сик һаҡсыһы ...ы, пограничник ...ы; **пограни́чная фо́рма** сик һаҡсыһы формаһы

**ПО́ГРЕБ** *м* баҙ, мөгәрәп; **ви́нный по́греб** шарап баҙы; **порохово́й по́греб** дары баҙы; **поста́вить смета́ну в по́греб** ҡаймаҡты мөгәрәпкә төшөрөп ҡуйыу

**ПОГРЕБА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күмеү ...ы, ерләү ...ы; **погреба́льный обря́д** ерләү йолаһы

**ПОГРЕБА́ТЬ** *несов. см.* **погрести́** I

**ПОГРЕБЕ́НИЕ** *с см.* **погрести́** I — **погреба́ть**

**ПОГРЕМУ́ШКА** *ж* шылтыраҡ; **трясти́ погрему́шкой** шылтыраҡ һелкетеү

**ПОГРЕСТИ́ I** *сов.* **1.** *кого* (*похоронить*) ерләү, күмеү; **погрести́ поко́йного** мәйет ерләү **2.** *что*; *перен.* (*укрыть, скрыть*) йәшереү, йыйып (ҡасырып) ҡуйыу **3.** *кого-что, под чем* (*засыпать, завалить*) күмеү, күмеп ташлау

**ПОГРЕСТИ́ II** *сов.* (*веслом*) ишә биреү, (бер аҙ) ишеү; (*граблями*) йыйыштырыу, йыя биреү, (бер аҙ) тырмалау

**ПОГРЕ́ТЬ** *сов. кого-что* и *без доп.* йылытып алыу, (бер аҙ) йылытыу; **погре́ть во́ду** һыу йылытып алыу

**ПОГРЕ́ТЬСЯ** *сов.* йылынып алыу, (бер аҙ) йылыныу

**ПОГРЕШИ́ТЬ** *сов. против чего, чем* хаталыҡ (хилафлыҡ, яңылышлыҡ) эшләү (ҡылыу), хаталаныу; **погреши́ть про́тив и́стины** хәҡиҡәткә хилафлыҡ ҡылыу

**ПОГРЕ́ШНОСТЬ** *ж* **1.** хата, яңылышлыҡ, хаталыҡ; **погре́шность в вычисле́нии** хисаплауҙағы яңылышлыҡ; **стилисти́ческие погре́шности** стилистик хаталар **2.** (*недостаток в работе какого-л. устройства*) кәмселек, етешһеҙлек; **погре́шности в мото́ре** моторҙағы кәмселектәр

**ПОГРОЗИ́ТЬ** *сов. кому* и *без доп.* янау, янап ҡуйыу; **погрози́ть па́льцем** бармаҡ янау

**ПОГРО́М** *м* погром (*берәй милләтте йәки уның төркөмөн үлтереү, ҡырыу, талау өсөн ойошторолған реакцион-шовинистик сығыш*)

**ПОГРО́МНЫЙ,** -ая, -ое погромға саҡырған (өндәгән); **погро́мные выступле́ния** погромға саҡырған сығыштар

**ПОГРО́МЩИК** *м* погромсы

**ПОГРУБЕ́ТЬ** *сов. см.* **грубе́ть**; **ко́жа погрубе́ла** тире ҡытыршылана төшкән; **го́лос у него́ погрубе́л** уның тауышы ҡалынайған

**ПОГРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **погрузи́ть**

**ПОГРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **погрузи́ться** **2.** *страд. от* **погружа́ть**

**ПОГРУЖЕ́НИЕ** *с см.* **погрузи́ть** 1, 2 — **погружа́ть, погрузи́ться** 1, 2 — **погружа́ться**

**ПОГРУЗИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *во что* батырыу, сумырыу; **погрузи́ть ведро́ в во́ду** биҙрәне һыуға сумырыу; **погрузи́ть но́ги в песо́к** аяҡтарҙы ҡомға батырыу **2.** *во что*; *перен.* талдырыу, батырыу, һалыу, сумырыу; **погрузи́ть в разду́мья** уйға батырыу; **погрузи́ть в сон** йоҡоға талдырыу **3.** тейәү; **погрузи́ть мешки́ на теле́гу** тоҡтарҙы арбаға тейәү

**ПОГРУЗИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *во что* и *без доп.* батыу, сумыу; **ведро́ погрузи́лось в во́ду** күнәк һыуға батты **2.** *во что*; *перен.* батыу, сумыу, талыу; **погрузи́ться в мечты́** хыялға сумыу; **погрузи́ться в чте́ние** (китап) уҡырға сумыу; **погрузи́ться в тишину́** тынлыҡҡа сумыу; **погрузи́ться в сон** йоҡоға талыу **3.** тейәлеү; **пассажи́ры погрузи́лись в ваго́ны** пассажирҙар вагондарға тейәлде

**ПОГРУ́ЗКА** *ж см.* **погрузи́ть** 3 — **погружа́ть, погрузи́ться** 3 — **погружа́ться**; **погру́зка у́гля** күмер тейәү

**ПОГРУ́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (йөк) тейәү ...ы; **погру́зочные рабо́ты** тейәү эштәре **2.** тейәй торған; **погру́зочные маши́ны** тейәй торған машиналар

**ПОГРУ́ЗЧИК** *м* тейәгес; **ковшо́вый погру́зчик** сүмесле тейәгес

**ПОГРУСТИ́ТЬ** *сов.* бошоноп (яманһыулап) алыу

**ПОГРУСТНЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* бошоноп (яманһыулап) китеү

**ПОГРЫ́ЗТЬ** *сов. что* (бер аҙ) кимереү, кимереп алыу (*һөйәкте*); ярып ашау (*сәтләүекте*)

**ПОГРЫ́ЗТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о животных*) тешләшеп алыу **2.** *перен., разг.* талашып бөтөү

**ПОГРЯЗА́ТЬ** *несов. см.* **погря́знуть**

**ПОГРЯ́ЗНУТЬ** *сов. в чём*; *прям.*, *перен.* батыу, сумыу, батып (сумып) ҡалыу; **погря́знуть в грязи́** батҡаҡҡа батыу; **погря́знуть в неве́жестве** наҙанлыҡта батыу

**ПОГУБИ́ТЬ** *сов. см.* **губи́ть**; **град погуби́л хлеба́** боҙлауыҡ игенде һәләк иткән

**ПОГУДЕ́ТЬ** *сов.* геүләү, ҡысҡыртыу, геүелдәп (ҡысҡыртып) алыу, ҡысҡыртып тороу

**ПОГУ́ЛИВАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** (*похаживать*) йөрөштөрөү **2.** (*изредка кутить*) типтергеләү

**ПОГУЛЯ́ТЬ** *сов.* **1.** йөрөү, йөрөп алыу; **погуля́ть пе́ред сном** йоҡо алдынан йөрөп алыу **2.** *разг.* (*повеселиться*) күңел асыу, теттереү, типтереү, әйттереү; **погуля́ть на сва́дьбе** туйҙа әйттереү

**ПОД I** *м* мейес төбө

**ПОД II** и **ПОДО** *предлог* **1.** *с вин. п.* (*при указании предмета*, *места*, *лица и т.п.*, *ниже которого направлено действие*) аҫтына, төбөнә; **поста́вить чемода́н под крова́ть** сумаҙанды карауат аҫтына ҡуйыу; **положи́ть под стекло́** быяла аҫтына һалыу; **смотре́ть по́д ноги** аяҡ аҫтына ҡарау; **спусти́ться под во́ду** һыу төбөнә төшөү

**2.** *с вин. п.* (*при обозначении состояния*, *положения*, *в которое ставят кого-что-л.*) аҫтына, -ға/-гә; **отда́ть под суд** судҡа биреү; **взять под свою́ защи́ту** үҙ ҡанатың аҫтына алыу

**3.** *с вин. п.* (*при указании места*, *в непосредственную близость которого направляется кто-что-л.*) алдынан, -ға/-гә табан (яҡын, ҡаршы); **под Москву́** Мәскәүгә яҡын

**4.** *с вин. п.* (*при указании на время*, *которое непосредственно предшествует чему-л.*) алдынан, -ға/-гә табан (яҡын, ҡаршы); **под пра́здник** байрам алдынан; **под ве́чер** кискә табан; **в ночь под Но́вый год** Яңы йылға ҡаршы төндө

**5.** *с вин. п.* (*при приблизительном указании на возраст*, *количество*) самаһы, тирәһе, -ға/-гә яҡын; **лет под шестьдеся́т** алтмыш йәштәр самаһы

**6.** *с вин. п.* (*при указании на звуки*, *сопровождающие действие*, *состояние*) аҫтында, -ға/-гә ҡушылып; **под аплодисме́нты** ҡул сабыуҙар аҫтында; **петь под гита́ру** гитараға ҡушылып йырлау

**7.** *с вин. п.* (*при указании на назначение предмета*) -ға/-гә тигән, өсөн; **буты́лка под молоко́** һөткә тигән шешә; **взять зе́млю под сад** баҡса өсөн ер алыу

**8.** *с вин. п.* (*при указании на сходство*, *подобие*) -ға/-гә оҡшатып, -на/-нә (тура) килтереп; **отде́лать под мра́мор** мәрмәргә оҡшатып эшләү; **вы́брать под цвет** төҫөнә тура килтереп һайлап алыу

**9.** *с тв. п.* (*при указании лица*, *предмета*, *места*, *ниже которого находится кто-что-л.*) аҫтында, төбөндә, аҫтынан; **идти́ под дождём** ямғыр аҫтында барыу; **стоя́ть под де́ревом** ағас төбөндә тороу; **под голово́й** баш аҫтында; **ло́дка прохо́дит под мосто́м** кәмә күпер аҫтынан үтә; **рабо́тать под землёй** ер аҫтында эшләү; **умы́ться под кра́ном** кран аҫтында йыуыныу

**10.** *с тв. п.* (*при указании условий*, *которые создаются для кого-чего-л.*) аҫтында, -ында/-ендә; **под надзо́ром** күҙәтеү аҫтында; **под руково́дством** етәкселегендә; **под защи́той дру́га** дуҫтың ҡанаты аҫтында

**11.** *с тв. п.* (*при указании на то*, *в результате*, *вследствие чего совершается действие*) аҫтында, -дан/-дән; **пригиба́ться под тя́жестью** ауырлыҡтан эйелеү; **под впечатле́нием пое́здки** йөрөп ҡайтыу тәьҫиренән; **под де́йствием тепла́** йылылыҡ тәьҫиренән

**12.** *с тв. п.* (*при указании условия особого обстоятельства совершения действия*) аҫтында, менән, итеп; **уйти́ под предло́гом боле́зни** ауырыу һылтауы менән китеү; **сообщи́ть под секре́том** сер итеп хәбәр итеү; **свиде́тельствовать под прися́гой** ант итеп раҫлау; **писа́ть под псевдони́мом** псевдоним менән яҙыу

**13.** *с тв. п.* (*при указании места*, *около которого находится кто-что-л.*) янында, яҡынында, эргәһендә; **под го́родом** ҡала янында; **под окно́м** тәҙрә эргәһендә

**14.** *с тв. п.* (*при указании на характерный признак чего-л.*) -лы/-ле, булған; **дом под желе́зной кры́шей** ҡалай түбәле йорт; **ла́мпа под абажу́ром** абажурлы лампа

**15.** *с тв. п.* (*при разъяснении смысла чего-л.*) -дан/-дән, аҫтында; **что понима́ть под э́тим сло́вом?** был һүҙҙән ни аңларға һуң? ♦ **взять по́д руку** ҡултыҡлап алыу; **под зало́г** залогка (әйбер) ҡуйып; **под распи́ску** ҡул ҡуйҙырып; **под че́стное сло́во** һүҙенә ышанып; **пря́тать под замо́к** бикләп ҡуйыу; **(храни́ть) под замко́м** бикләп (һаҡлау); **не под си́лу** хәлдән килмәү, көс етмәү; **под но́сом** танау аҫтында; **под стать** яраҡлы, тура килгән

**ПОД...** (**подо...**, **подъ...**) *приставка* **1.** *ҡылым яһағанда ҡулланылып*, *түбәндәгеләрҙе аңлата*: 1) *аҫтан өҫкә булған эш-хәрәкәтте*, *мәҫ.*, **подбро́сить** сөйөп ебәреү; 2) *берәй нәмәнең аҫтынан*, *аҫтында булған эш-хәрәкәтте*, *мәҫ.*, **подложи́ть** аҫтына һалыу; **подгоре́ть** аҫты көйөү; **подста́вить** аҫтына ҡуйыу; 3) *эшхәрәкәттең берәй нәмәнең аҫтына таралғанын*, *мәҫ.*, **подши́ть** аҫтан тегеп ҡуйыу; **подмочи́ть** аҫтан еүешләү; 4) *кемгәләр*, *нимәгәләр яҡынайыуҙы*, *мәҫ.*, **подойти́** янына килеү; 5) *өҫтәүҙе*, *мәҫ.*, **подли́ть** өҫтәп ҡойоу; 6) *һөҙөмтәһен яҡшыртыу йәһәтенән булған өҫтәмә эш-хәрәкәтте*, *мәҫ.*, **подвари́ть** ҡайната төшөү, ҡайнатыңҡырау; **подвинти́ть** бора төшөү, бороңҡорау; 7) *эш-хәлдең аҙһытылған дәрәжәлә булыуын*, *мәҫ.*, **подлечи́ться** дауаланып алыу, бер аҙ дауаланыу; **подкра́сить** бояштырып

ҡуйыу; 8) *эш-хәлдең йәшерен булыуын, мәҫ.*, **подгля́дывать** йәшерен ҡарап тороу, ситтән (аҫтан) генә күҙәтеү; **подкра́сться** боҫоп барыу (килеү); 9) *эш-хәрәкәттең ниҙеңдер артынан ҡабатланыуын йәки икенсе берәүҙең эш-хәрәкәтенә ҡушылыуын, мәҫ.*, **подпева́ть** ҡушылып йырлау; **подда́кивать** йөпләп тороу

**2.** *исем һәм сифат яһағанда түбәндәгеләрҙе аңлата*: 1) *берәй нәмәнең аҫҡы, түбәндәге өлөшөндә булғанды, мәҫ.*, **поджелу́дочный** ашҡаҙан аҫтындағы; **подко́жный** тире аҫтындағы; 2) *туранан-тура ниҙеңдер янында урынлашҡанды, булғанды, мәҫ.*, **подгоро́дный** ҡала янындағы; 3) *берәй бөтөндөң өлөшөн, бүлеген тәшкил иткәнде, мәҫ.*, **подгру́ппа** төркөмсә; **подотде́л** бүлексә; 4) *берәй нәмәгә ҡарағанды, берәй нәмәнең ҡарамағында булғанды, мәҫ.*, **поднадзо́рный** күҙәтеү аҫтындағы; **подсле́дственный** тикшереү аҫтындағы; 5) *дәрәжәһе икенсенекенән түбән берәй шөғөл, вазифа һ.б. буйынса кемдеңдер ярҙамсыһы булғанды, мәҫ.*, **подмасте́рье** оҫта(ның) ярҙамсыһы; **подпа́сок** көтөүсе ярҙамсыһы

**ПОДАВА́ТЬ** *несов. см.* **пода́ть** ♦ **подаёт наде́жды** *см.* **наде́жда**

**ПОДАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пода́ться** **2.** *страд. от* **подава́ть**

**ПОДАВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (бер аҙ) баҫып (ҡыҫып) тороу; **подави́ть больно́е ме́сто** ауыртҡан урынды баҫып тороу **2.** *что* (*раздавить всё, многое, всех, многих*) һытып (иҙеп) бөтөрөү; **подави́ть все я́йца** бөтә йомортҡаларҙы һытып бөтөрөү **3.** *что* баҫыу, баҫтырыу; **подави́ть мяте́ж** фетнәне баҫтырыу **4.** *что*; *перен.* еңеү, тыйып (баҫып, тыйылып) ҡалыу, тыйылыу, туҡталыу; **подави́ть страх** ҡурҡыуҙы еңеү; **подави́ть улы́бку** йылмаймай тыйылып ҡалыу **5.** *кого-что, чем* баҫып (ҡаплап) тороу, баҫыу; **подави́ть авторите́том** абруй менән баҫып тороу; **подави́ть свои́м вели́чием** үҙеңдең мөһабәтлелегең менән баҫыу **6.** *кого-что* (*привести в мрачное состояние*) рухын төшөрөү, күңел төшөнкөлөгөнә килтереү

**ПОДАВИ́ТЬСЯ** *сов.* тамаҡҡа тороу (тығылыу, ҡаҙалыу)

**ПОДАВЛЕ́НИЕ** *с см.* **подави́ть** 3, 4 — **подавля́ть**

**ПОДА́ВЛЕННОСТЬ** *ж* күңел (рух) төшөнкөлөгө

**ПОДА́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **подави́ть** **2.** *прил.* әкрен, ишетелер-ишетелмәҫ; **пода́вленный стон** ишетелер-ишетелмәҫ ыңғырашыу **3.** *прил.* төшөнкө, бойоҡ, рухи иҙелгән; **пода́вленное настрое́ние** төшөнкө кәйеф

**ПОДАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **подави́ть** 3—6

**ПОДАВЛЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **подавля́ть** **2.** *прил.* иң ҙур, өҫтөнлөк иткән; **подавля́ющее большинство́** өҫтөнлөк иткән күпселек

**ПОДА́ВНО** *нареч.*; *разг.* күптән, һис шикһеҙ; **он пода́вно согла́сен** ул күптән риза

**ПОДА́ГРА** *ж* подагра (*быуынға тоҙ ултырыу ауырыуы*)

**ПОДА́ГРИК** *м*; *разг.* подагра ауырыулы кеше

**ПОДА́ЛЬШЕ** *нареч.*; *разг.* (тағы ла) арыраҡ; **отойти́ пода́льше от большо́й доро́ги** оло юлдан арыраҡ китеү ♦ **от греха́ пода́льше** *см.* **грех**

**ПОДАРИ́ТЬ** *сов. см.* **дари́ть**; **подари́ть на па́мять** иҫтәлеккә бүләк итеү

**ПОДА́РОК** *м* бүләк; **де́нежный пода́рок** аҡсалата бүләк; **сва́дебный пода́рок** туй бүләге; **преподнести́ кни́гу в пода́рок** бүләккә китап биреү

**ПОДА́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое бүләклек, бүләккә тигән, бүләк итеп бирелгән; **пода́рочное изда́ние** бүләккә тәғәйенләнгән баҫма, бүләк баҫмаһы

**ПОДА́ТЕЛЬ** *м* и **ПОДА́ТЕЛЬНИЦА** *ж*; *офиц.* тапшырыусы, биреүсе; **пода́тель письма́** хат тапшырыусы

**ПОДА́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** эшкәртеүгә килгән, бөгөлөүсән һығылыусан, үҙле; **пода́тливая гли́на** үҙле балсыҡ; **пода́тливый материа́л** эшкәртеүгә килгән материал **2.** (*уступчивый*) һүҙ тыңлаусан, ыңғайға килгән, ҡарышмаған, күндәм, ипле, юл биреүсән; **пода́тливый хара́ктер** ипле характер

**ПО́ДАТЬ** *ж*; *ист.* һалым (*революцияға тиклем Рәсәйҙә йән башынан алынған*)

**ПОДА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *с неопр.* биреү, алып (килтереп) биреү; **пода́ть пальто́** пальтоны алып биреү; **пода́ть напи́ться** эсергә килтереп биреү **2.** *что* килтереү, килтереп ҡуйыу (ултыртыу); **пода́ть обе́д** төшкө аш килтереп ултыртыу **3.** *что* и *без доп.* (*милостыню*) хәйер биреү **4.** *что* (килтереп) ҡуйыу, биреү; **по́езд по́дали на пе́рвую платфо́рму** поезды беренсе юлға ҡуйҙылар **5.** *что* килтереп тороу; **пода́ть руду́ к до́мне** мәғдәнде домнаға килтереп тороу; **пода́ть лес на стро́йку** төҙөлөшкә ағас килтереп тороу **6.** *что* и *без доп.* биреү; **пода́ть заявле́ние** ғариза биреү **7.** *что* и *без доп.*; *разг.* (этәреп) ебәреү, алып китеү, күсереп ҡуйыу, биреү; **пода́ть бревно́ в сто́рону** бүрәнәне ситкә күсереп ҡуйыу; **пода́ть маши́ну вперёд** машинаны алға биреү; **пода́ть немно́го наза́д** артҡараҡ күсереп ҡуйыу **8.** *что* биреү, итеү; **пода́ть весть** хәбәр биреү; **пода́ть по́мощь** ярҙам итеү; **пода́ть сове́т** кәңәш биреү; **пода́ть сигна́л** сигнал биреү ♦ **пода́ть го́лос**: 1) (*заявить о своём присутствии*) тауыш биреү, өндәшеү; 2) *за кого* (*проголосовать*) тауыш биреү; **пода́ть приме́р** үрнәк күрһәтеү; **пода́ть ру́ку** ҡул биреү, ҡул һуҙыу

**ПОДА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** урынынан ҡуҙғалыу; **дверь подала́сь под уда́рами** һуға торғас, ишек урынынан ҡуҙғалды **2.** тайпылыу, тайшаныу; **пода́ться в сто́рону** ситкә тайшаныу **3.** *перен.*, *разг.* (*согласиться, уступить уговорам*) күнеү,

риза булыу **4.** *разг.* (*уехать, уйти*) китеп барыу; **пода́ться в го́род** ҡалаға китеп барыу

**ПОДА́ЧА** *ж см.* **пода́ть** — **подава́ть**

**ПОДА́ЧКА** *ж; разг.* **1.** һыныҡ, киҫәк (*эткә, тереклеккә ташланған ашамлыҡ*) **2.** *перен.* хәйер, саҙаҡа; **жить пода́чками** хәйер һорап көн күреү

**ПОДАЯ́НИЕ** *с* хәйер

**ПОДБА́ВИТЬ** *сов. что, чего* өҫтәү, өҫтәй биреү (төшөү); **подба́вить са́хару в чай** сәйгә шәкәр өҫтәй биреү

**ПОДБАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **подба́вить**

**ПОДБА́ДРИВАТЬ** *несов. см.* **подбодри́ть**

**ПОДБА́ДРИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подбодри́ться 2.** *страд. от* **подба́дривать**

**ПОДБА́ЛТЫВАТЬ** *несов. см.* **подболта́ть**

**ПОДБЕГА́ТЬ** *несов. см.* **подбежа́ть**

**ПОДБЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *к кому-чему* йүгереп килеү (барыу); **подбежа́ть к до́му** йорт янына йүгереп килеү **2.** *подо что* (аҫтына) йүгереп инеү; **подбежа́ть под мост** күпер аҫтына йүгереп инеү

**ПОДБЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **подбели́ть**

**ПОДБЕЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ағарта биреү (төшөү), әҙерәк (бер аҙ) ағартып алыу; **подбели́ть печь** мейесте әҙерәк ағартып алыу **2.** *прост.* (*приправить сметаной, молоком*) (бер аҙ) һөт (ҡаймаҡ) һалыу (*сәйгә, борщҡа*)

**ПОДБЕРЁЗОВИК** *м* ҡайын бәшмәге

**ПОДБИВА́ТЬ** *несов. см.* **подби́ть**

**ПОДБИРА́ТЬ** *несов. см.* **подобра́ть**

**ПОДБИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подобра́ться 2.** *страд. от* **подбира́ть**

**ПОДБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (аҫтынан) ҡағыу (һалыу); **подби́ть подмётки к ту́флям** туфлиға олтан һалыу; **подби́ть подко́ву** даға ҡағыу **2.** *что, чем; разг.* эсләү, эслек ҡуйыу; **подби́ть пальто́ шёлком** пальтоға ебәк эслек ҡуйыу **3.** *кого-что; разг.* (*уронить, сбить, ударив снизу*) аҫтан һуғып ебәреү, һуғып (бәреп) төшөрөү (йығыу); **подби́ть самолёт** самолётты бәреп төшөрөү **4.** *что* бәреп (һуғып) имгәтеү (йәрәхәтләү); **подби́ть глаз** күҙҙе һуғып йәрәхәтләү **5.** *на что* и *с неопр.; перен., разг.* ҡотортоу, эйҙәләү; **подби́ть на ша́лость** шаярыуға ҡотортоу

**ПОДБОДРИ́ТЬ** *сов. кого* күңелен күтәреп (дәртләндереп) ебәреү; **подбодри́ть больно́го** ауырыуҙың күңелен күтәреп ебәреү

**ПОДБОДРИ́ТЬСЯ** *сов.* күңелләнеп (күңел күтәрелеп) китеү

**ПОДБОДРЯ́ТЬ** *несов. см.* **подбодри́ть**

**ПОДБОДРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подбодри́ться 2.** *страд. от* **подбодря́ть**

**ПОДБОЛТА́ТЬ** *сов. разг.* болғата-болғата өҫтәү; **подболта́ть муки́ в опа́ру** эсеткегә болғата-болғата он өҫтәү

**ПОДБО́Р** *м* **1.** *см.* **подобра́ть** 1, 2, 5 — **подбира́ть 2.** (*коллекция*) һайланыш, һайлап алған (*нәмә*); **подбо́р книг** китаптарҙы һайлап алыу ♦ **как на подбо́р** һайлап алған кеүек (*бөтәһе лә бер тигеҙ*)

**ПОДБО́РКА** *ж* **1.** *разг. см.* **подобра́ть** 5; **2.** *спец.* шәлкем; **подбо́рка стате́й** мәҡәләләр шәлкеме

**ПОДБОРО́ДНИК** *м; спец.* **1.** (*часть конской узды*) һағалдыраҡ **2.** (*у скрипки, альта*) эйәк мендәре (*эйәк менән ҡорамалды йәпле тотоу өсөн*)

**ПОДБОРО́ДОК** *м* эйәк

**ПОДБОРО́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое эйәк ...ы; **подборо́дочная мы́шца** эйәк мускулы

**ПОДБО́РЩИК** *м* **1.** һайлаусы, сортҡа айырыусы; **подбо́рщик мехо́в** тиреләрҙе сортҡа айырыусы **2.** (*механизм*) йыйғыс (яйланма); **бараба́нный подбо́рщик** барабанлы йыйғыс

**ПОДБО́РЩИЦА** *ж см.* **подбо́рщик** 1

**ПОДБОЧЕ́НИВАТЬСЯ** *несов. см.* **подбоче́ниться**

**ПОДБОЧЕ́НИТЬСЯ** *сов.; разг.* бөйөргә (билгә) таяныу

**ПОДБРА́СЫВАНИЕ** *с см.* **подбра́сывать**

**ПОДБРА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **подбро́сить**

**ПОДБРИВА́ТЬ** *несов. см.* **подбри́ть**

**ПОДБРИ́ТЬ** *сов. кого-что* ян-ягын (сит-ситен) ҡырыу; **подбри́ть усы́** мыйыҡтың сит-ситен ҡырыу

**ПОДБРО́СИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*подкинуть вверх*) сөйөү, ырғытыу, һикертеү, сөйөп (ырғытып, һикертеп) ебәреү; **подбро́сить мяч** тупты сөйөү **2.** *кого-что обычно безл.* һиңкетеп (һикертеп) ебәреү; **нас си́льно подбро́сило на уха́бе** беҙҙе һикәлтәлә нык ҡына һикертте **3.** *что, чем; разг.* (*вскинуть руку, голову*) кинәт күтәреп (ташлап) ебәреү **4.** *что, чего* (*бросить немного*) өҫтәү, өҫтәй төшөү, өҫтәп ташлау; **подбро́сить дров в печь** мейескә утын өҫтәү **5.** *кого-что* (*тайком подложить*) ташлап (ҡалдырып) китеү, килтереп ташлау (*йәшерен рәүештә*); **подбро́сить письмо́** хат ҡалдырып китеү **6.** *кого-что; разг.* (*подвезти*) илтеп ҡуйыу (ташлау); **подбро́сить до ста́нции** *кого-л.* *берәйһен* станцияға илтеп ташлау

**ПОДБРЮ́ШНИК** *м* (*часть сбруи*) бауырлыҡ, **подтяну́ть подбрю́шник** бауырлыҡты тартыу

**ПОДВА́Л** *м* **1.** иҙән аҫты, подвал **2.** (*в газете*) подвал

**ПОДВА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **подвали́ть**

**ПОДВАЛИ́ТЬ I** *сов.* **1.** *что; разг.* янына өйөү (ауҙарыу, бушатыу); **подвали́ть к забо́ру песо́к** ҡойма янына ҡом килтереп ауҙарыу **2.** *что, чего; прост.* өҫтәп һалыу, өҫтәй төшөү (биреү); **подвали́ть в костёр хво́росту** усаҡҡа сыбыҡ-сабыҡ өҫтәп һалыу

**ПОДВАЛИ́ТЬ II** *сов. кого-чего безл.; прост.* (*прийти куда-л. в большом количестве*) өҫтәлеү, килеп йыйылыу, өҫтө-өҫтөнә килеү

**ПОДВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иҙән аҫты ...ы, подвал ...ы; **подва́льные о́кна** иҙән аҫты тәҙрәләре **2.** (*расположенный в подвале*) иҙән аҫтындағы, подвалдағы; **подва́льное помеще́ние** иҙән аҫтындағы бүлмәләр; **подва́льная ка́мера** иҙән аҫтындағы камера **3.** (*в газете*) подвал ...ы; **подва́льная статья́** подвал мәкәләһе

**ПОДВЕ́ДОМСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое ведомство ҡарамағындағы; **подве́домственное учрежде́ние** ведомство ҡарамағындағы учреждение

**ПОДВЕЗТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* ултыртып алып барыу (килеү), килтереү; **подвезти́ до го́рода** ҡалаға тиклем ултыртып алып барыу **2.** *что, чего* килтереү, алып килеү; **подвезти́ това́р в магази́н** магазинға тауар алып килеү **3.** *кому безл.*; *разг. см.* **везти́** 2

**ПОДВЕНЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое никах ...ы; **подвене́чное пла́тье** никах күлдәге

**ПОДВЕРГА́ТЬ** *несов. см.* **подве́ргнуть**

**ПОДВЕРГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подве́ргнуться 2.** *страд. от* **подверга́ть**

**ПОДВЕ́РГНУТЬ** *сов. кого-что, чему* дусар итеү, -ға/-гә ҡуйыу (алыу, тарттырыу), аҫтына ҡуйыу; **подве́ргнуть выступле́ние кри́тике** сығышты тәнҡиткә алыу; **подве́ргнуть прое́кт обсужде́нию** проектты тикшереүгә ҡуйыу; **подве́ргнуть свою́ жизнь опа́сности** ғүмереңде ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыу; **подве́ргнуть наказа́нию** язаға тарттырыу

**ПОДВЕ́РГНУТЬСЯ** *сов.* дусар булыу (ителеү), -ға/-гә тарыу (төшөү, тарттырылыу, эләгеү), аҫтына эләгеү; **подве́ргнуться кри́тике** тәнҡиткә эләгеү; **подве́ргнуться наказа́нию** язаға тарттырылыу

**ПОДВЕ́РЖЕННЫЙ,** -ая, -ое дусар булған (ителгән), -ға/-гә тиҙ бирелеүсән (бирешеүсән); **челове́к, подве́рженный боле́зням** ауырыуҙарға тиҙ бирешеүсән кеше

**ПОДВЕРНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡайтарыу, һыҙғаныу, ҡайтарып (бөкләп) ҡуйыу; **подверну́ть рукава́** еңдәрҙе ҡайтарып ҡуйыу **2.** (*завернуть края подо что-л.*) ҡыҫтырыу, ҡымтыу; **подверну́ть одея́ло** юрғанды ҡымтыу **3.** (*согнув ногу, руку и т.д., поместить подо что-л.*) бөкләп аҫҡа ҡуйыу (һалыу) **4.** (*повредить*) кимәлйетеү; **подверну́ть но́гу** аяҡты кимәлйетеү **5.** (*убавить огонь*) баҫыу, ҡыҫыу, баҫа (ҡыҫа) төшөү; **подверну́ть ла́мпу** лампаны ҡыҫыу **6.** (*завинтить*) бора төшөү (биреү), бороп ҡуйыу (сығыу); **подверну́ть винт** винтты бора биреү

**ПОДВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*загнуться*) ҡайтарылыу, ҡыҫылып (бөкләнеп) ҡалыу; **край шля́пы подверну́лся внутрь** эшләпәнең сите эскә ҡайтарылған **2.** (*неловко подогнуться*) тайшаныу, тайпылыу, ҡайырылып (тайшанып) ҡалыу (ҡуйыу) **3.** (*повредиться — о ноге*) кимәлйеү **4.** *разг.* тап булыу, килеп сығыу, юлығыу; **подверну́лась интере́сная кни́га** ҡыҙыҡлы китап тап булды; **подверну́лась путёвка** путёвка килеп сыҡты ♦ **подверну́ться по́д руку** *кому* ҡулға эләгеү

**ПОДВЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **подверну́ть**

**ПОДВЁРТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подверну́ться 2.** *страд. от* **подвёртывать**

**ПОДВЕ́СИТЬ** *сов. что* аҫып (элеп, тағып) ҡуйыу; **подве́сить ла́мпу к потолку́** шәмде түшәмгә аҫып ҡуйыу ♦ **язы́к хорошо́ подве́шен** *см.* **язы́к**

**ПОДВЕ́СИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* аҫылынып тороу

**ПОДВЕ́СКА** *ж* **1.** *см.* **подве́сить — подве́шивать 2.** (*подвешенное украшение*) сулпы; **лю́стра со стекля́нными подве́сками** быяла сулпылы шәмдәл

**ПОДВЕСНО́Й,** -ая, -ое аҫылмалы, аҫмалы; **подвесна́я ла́мпа** аҫмалы лампа; **подвесно́й мост** аҫылмалы күпер

**ПОДВЕ́СОК** *м*; *разг. см.* **подве́ска** 2

**ПОДВЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* алып килеү, килтереү, килтереп еткереү; **подвести́ ло́шадь к воро́там** атты ҡапҡа янына килтереү **2.** *что, подо что* (аҫтына) ҡуйыу, (аҫтына) һалыу; **подвести́ фунда́мент под зда́ние** йортҡа нигеҙ һалыу **3.** *что, подо что* нигеҙләү; **подвести́ нау́чную ба́зу под програ́мму** фәнни базаны программаға нигеҙләү **4.** *кого-что* и *без доп.*; *разг.* ҡыйын хәлдә ҡалдырыу, ултыртыу; **подвести́ това́рища** иптәшеңде ҡыйын хәлдә ҡалдырыу **5.** *что* сығарыу, яһау; **подвести́ ито́ги** йомғаҡтар яһау **6.** *что* буяу, һөрмә тартыу; **подвести́ глаза́** күҙгә һөрмә тартыу **7.** *кого-что безл.*; *разг.* тартылыу, ҡыҫылыу, ҡыҫылып бөтөү; **живо́т от го́лода подвело́** асығыуҙан эс ҡыҫылып бөткән ♦ **подвести́ часы́** сәғәттең телен күсереү; **подвести́ черту́** тамамлау, йомғаҡ яһау

**ПОДВЕ́ТРЕННЫЙ,** -ая, -ое ел теймәгән, елдән ышыҡ; **подве́тренная сторона́** ел теймәгән яҡ

**ПОДВЕ́ШИВАНИЕ** *с см.* **подве́шивать**

**ПОДВЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **подве́сить**

**ПОДВЕ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подве́ситься 2.** *страд. от* **подве́шивать**

**ПОДВЗДО́ШНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* бығым (*кукрәк ауыҙындағы*); **подвздо́шная мы́шца** бығым мускулы ♦ **подвздо́шная кость** бығым һөйәге

**ПОДВИВА́ТЬ** *несов. см.* **подви́ть**

**ПОДВИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подви́ться 2.** *страд. от* **подвива́ть**

**ПО́ДВИГ** *м* батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ; **соверши́ть по́двиг** ҡаһарманлыҡ эшләү; **трудово́й по́двиг** хеҙмәт батырлығы

**ПОДВИ́ГАТЬ** *сов. что, чем* (*двигать некоторое время*) әҙерәк (бер аҙ) күсереү, күсереп (шыуҙырып) ҡуйыу, һелкетеп (ҡыймылдатып) ҡуйыу; **подви́гать па́льцами** бармаҡтарҙы ҡыймылдатып ҡуйыу; **подви́гать задви́жку** келәне бер аҙ күсереп ҡуйыу

**ПОДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **подви́нуть**

**ПОДВИ́ГАТЬСЯ** *сов.* йөрөп (ҡыймылдап) алыу

**ПОДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подви́нуться 2.** *страд. от* **подвига́ть**

**ПОДВИ́Д** *м*; *биол.* төрсә, ярым төр

**ПОДВИ́ЖНИК** *м* и **ПОДВИ́ЖНИЦА** *ж*; *высок.* фиҙаҡәр, ҡаһарман; **подви́жник нау́ки** фән ҡаһарманы

**ПОДВИ́ЖНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *высок.* фиҙаҡәрҙәрсә, ҡаһармандарса, батырҙарса; **подви́жническое отноше́ние** фиҙаҡәрҙәрсә мөнәсәбәт

**ПОДВИ́ЖНИЧЕСТВО** *с*; *высок.* фиҙаҡәрлек, ҡаһарманлыҡ

**ПОДВИЖНО́Й** и **ПОДВИ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** хәрәкәтләнә (ҡуҙғала) торған, шыумалы, хәрәкәтләнмәле, ҡуҙғалмалы; **подвижно́й блок** шыумалы блок; **подвижны́е ча́сти маши́ны** машинаның хәрәкәтләнмәле өлөштәре **2.** күсмә, күсеп йөрөмәле; **подвижно́й магази́н** күсмә магазин **3.** (*о человеке, животном*) хәрәкәтсән, теремек, йылғыр, сос; (*о лице*) хәрәкәтсел, уйнап торған; **подви́жный ребёнок** теремек бала; **подвижно́й ма́льчик** сос малай **4.** *перен.* отҡор; **подви́жный ум** отҡор аҡыл ♦ **подвижно́й соста́в** *спец.* хәрәкәттәге состав; **подви́жные и́гры** хәрәкәтле уйындар

**ПОДВИ́ЖНОСТЬ** *ж* **1.** хәрәкәтләнә (ҡуҙғала, шыуа) торған булыу, хәрәкәтсән булыу, ҡуҙғалып тороусанлыҡ; **подви́жность бло́ка** блоктың ҡуҙғалып тороусанлығы **2.** күсмәлек, күсеп йөрөмәлелек **3.** хәрәкәтсәнлек, хәрәкәтселлек; **подви́жность лица́** биттең хәрәкәтселлеге; **отлича́ться подви́жностью** хәрәкәтсәнлек менән айырылып тороу **4.** *перен.* отҡорлоҡ, етеҙлек; **подви́жность ума́** аҡыл етеҙлеге

**ПОДВИЗА́ТЬСЯ** *несов.*; *книжн., неодобр.* эшләп килеү, эш алып барыу; **успе́шно подвиза́ться в нау́ке** фән өлкәһендә уңышлы эшләп килеү

**ПОДВИНТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** бора биреү, нығыраҡ бороу; **подвинти́ть шуру́п** шөрөптө бора биреү **2.** (*привинтить*) бороп беркетеү, (аҫтан) бороп ҡуйыу; **подвинти́ть коньки́ к боти́нкам** конькиҙы ботинкаларға бороп беркетеү

**ПОДВИ́НУТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* күсереү, шыуҙырыу, шылдырыу, күсереп (шыуҙырып, шылдырып) ҡуйыу; **подви́нуть стул к столу́** ултырғысты өҫтәл янына күсереп ҡуйыу **2.** *что*; *перен., разг.* алға ебәреү; **подви́нуть рабо́ту** эште алға ебәреү

**ПОДВИ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** күсә төшөү, яҡыныраҡ килеү (шыуыу, күсеү, шылыу) **2.** *перен.* алға китеү (барыу); **рабо́та значи́тельно подви́нулась** эш байтаҡ алға китте

**ПОДВИ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **подвинти́ть**

**ПОДВИ́ТЬ** *сов. что* еңелсә (бер аҙ) бөҙрәләтеү; **подви́ть во́лосы** сәсте еңелсә бөҙрәләтеү

**ПОДВИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* еңелсә (бер аҙ) бөҙрәләп алыу

**ПОДВЛА́СТНЫЙ,** -ая, -ое ҡул аҫтындағы, буйһонған

**ПОДВО́ДА** *ж* ылау; **пароко́нная подво́да** пар атлы ылау

**ПОДВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **подвести́**

**ПОДВО́ДНИК** *м* подводник (**1.** *һыу аҫты кәмәһендә хеҙмәт итеүсе* **2.** *һыу аҫты белгесе*)

**ПОДВОДНО́Й,** -ая, -ое тоташтыра торған, тоташтырғыс; **подводны́е тру́бы** тоташтырғыс торбалар

**ПОДВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое һыу аҫты ...ы; **подво́дные расте́ния** һыу аҫты үҫемлектәре; **подво́дная ло́дка** һыу аҫты кәмәһе; **подво́дные рабо́ты** һыу аҫты эштәре

**ПОДВО́З** *м см.* **подвезти́** 1, 2 — **подвози́ть**

**ПОДВОЗИ́ТЬ** *несов. см.* **подвезти́** 1, 2

**ПОДВО́ЗКА** *ж см.* **подвезти́** 1, 2 — **подвози́ть**

**ПОДВО́ЗЧИК** *м* ташыусы; **подво́зчик брёвен** бүрәнә ташыусы

**ПОДВО́Й** *м*; *сад.* ялғанмыш (*икенсе бер үҫемлектең өлөшө ялғанған үҫемлек*)

**ПОДВО́РНЫЙ,** -ая, -ое йорт башына һалынған (булған, төшкән); **подво́рная по́дать** йорт башына һалынған һалым

**ПОДВОРОТНИЧО́К** *м* яға эслеге (таҫмаһы)

**ПОДВОРО́ТНЯ** *ж* **1.** (*щель между воротами и землёй*) ҡапҡа аҫты **2.** (*доска, закрывающая такую щель*) ҡапҡа аҫты таҡтаһы

**ПОДВО́Х** *м*; *разг.* этлек, хөсөтлөк; **почу́вствовать подво́х** этлек һиҙеү

**ПОДВЫВА́ТЬ** *несов.* **1.** ҡушылып олоу; **волчи́ца подвыва́ет во́лку** инә бүре ата бүрегә ҡушылып олой **2.** *разг.* (*выть время от времени*) олоп-олоп ҡуйыу

**ПОДВЫ́ПИТЬ** *сов. чего* и *без доп.*; *разг.* төшөрөп алыу, (әҙерәк) эсеп алыу

**ПОДВЯЗА́ТЬ** *сов. что* тағыу, бәйләү, тағып (бәйләп) ҡуйыу, (бәйләп) аҫып ҡуйыу; **подвяза́ть колоко́льчик к дуге́** дуғаға ҡыңғырау тағыу; **подвяза́ть больну́ю ру́ку** ауыртҡан ҡулды аҫып ҡуйыу; **подвяза́ть пла́тье пояско́м** күлдәктең билбауын бәйләп ҡуйыу

**ПОДВЯЗА́ТЬСЯ** *сов.* бәйләү, быуыу, бәйләп (быуып) ҡуйыу (алыу); **подвяза́ться кушако́м** билбау быуып алыу

**ПОДВЯ́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **подвяза́ть** — **подвя́зывать 2.** (*резинка, тесьма для чулок*) ҡысмау, ҡунысбау

**ПОДВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **подвяза́ть**

**ПОДВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подвяза́ться 2.** *страд. от* **подвя́зывать**

**ПОДГАДА́ТЬ** *сов.*; *разг.* етешеү, өлгөрөү; **подгада́ть к отъе́зду по́езда** поезд китеүгә өлгөрөү

**ПОДГА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **подгада́ть**

**ПОДГИБА́ТЬ** *несов. см.* **подогну́ть**

**ПОДГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подогну́ться 2.** *страд. от* **подгиба́ть**

**ПОДГЛА́ДИТЬ** *сов. что*; *разг.* яңынан (тағы) үтекләү; **подгла́дить воротни́к** яғаны яңынан үтекләү

**ПОДГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **подгла́дить**

**ПОДГЛАЗНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* күҙ соҡоро аҫты ...ы; **подглазни́чные же́лезы** күҙ соҡоро аҫты биҙҙәре

**ПОДГЛА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое күҙ төбөндәге; **подгла́зные мешки́** күҙ төбөндәге шешмәк

**ПОДГЛА́ЗЬЕ** *с* күҙ төбө

**ПОДГЛЯДЕ́ТЬ** *сов. что* күреп ҡалыу

**ПОДГЛЯ́ДЫВАНИЕ** *с см.* **подгля́дывать**

**ПОДГЛЯ́ДЫВАТЬ** *несов.* ҡараштырыу, аҫтыртын (йәшерен) ҡарап тороу

**ПОДГНИВА́ТЬ** *несов. см.* **подгни́ть**

**ПОДГНИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*сгнить в нижней части*) аҫтан (төптән) сереү **2.** (*немного сгнить*) серенкерәү, серей төшөү (биреү); **я́годы подгни́ли** еләктәр сереңкерәгән

**ПОДГОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **подговори́ть**

**ПОДГОВОРИ́ТЬ** *сов.* ҡотортоу, ҡотортоп эшләтеү, димләү, өндәү, ҡотҡо һалыу; **подговори́ть дете́й на прока́зы** балаларҙы шуҡлыҡҡа ҡотортоу

**ПОДГОЛО́ВНИК** *м* **1.** яҫтау (*яҫтыҡ аҫтына ҡуйыла торған кҡтәрмә таҡта*) **2.** баш терәгес (ҡуйғыс) (*креслоға, ултырғысҡа ҡуйыла торған терәү*)

**ПОДГОЛО́СОК** *м* **1.** *муз.* ҡушылыусы (эйәрсен) тауыш (*йырҙа төп тауышҡа ҡушылған тауыш*) **2.** *перен.* йырын йырлаусы, көйөн көйләүсе, ҡуштан

**ПОДГО́Н** *м см.* **подогна́ть** 1—4 — **подгоня́ть**

**ПОДГО́НКА** *ж см.* **подогна́ть** 1, 4 — **подгоня́ть**

**ПОДГОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **подогна́ть**

**ПОДГОРА́ТЬ** *несов. см.* **подгоре́ть**

**ПОДГОРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое (*о хлебе и т.п.*) көйгән; (*о молоке*) күмһегән; **подгоре́лый хлеб** көйгән икмәк

**ПОДГОРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*о хлебе*) көйөү; (*о молоке и т.п.*) күмһеү **2.** *разг.* (*сгореть снизу*) аҫтан (төптән) яныу

**ПОДГО́РНЫЙ,** -ая, -ое тау аҫтындағы (итәгендәге), тау ...ы; **подго́рный родни́к** тау аҫтынан сыҡҡан шишмә

**ПОДГОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое ҡала янындағы (тирәһендәге); **подгоро́дные зе́мли** ҡала тирәһендәге ерҙәр

**ПОДГО́РЬЕ** *с* тау итәге (аҫты)

**ПОДГОТА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **подгото́вить**

**ПОДГОТА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подгото́виться 2.** *страд. от* **подгота́вливать**

**ПОДГОТОВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое әҙерлек ...ы, әҙерләү ...ы; **подготови́тельные рабо́ты** әҙерлек эштәре; **подготови́тельные ку́рсы** әҙерлек курстары

**ПОДГОТО́ВИТЬ** *сов.* **1.** *что* әҙерләү, хәстәрләү, әҙерләп (хәстәрләп) ҡуйыу; **подгото́вить ле́кцию** лекция әҙерләү; **подгото́вить кни́гу к печа́ти** китапты баҫтырыуға әҙерләү **2.** *кого-что* әҙерләү, әҙерләп сығарыу; **подгото́вить к экза́менам** имтиханға әҙерләү; **подгото́вить специали́стов** белгестәр әҙерләп сығарыу **3.** *кого-что* (*настроить определённым образом*) (алдан) әҙерләү, (алдан) әҙерләп ҡуйыу; **подгото́вить к разгово́ру** һөйләшеүгә әҙерләү

**ПОДГОТО́ВИТЬСЯ** *сов.* әҙерләнеү, әҙерләнеп ҡуйыу (тороу); **подгото́виться к се́ву** сәсеүгә әҙерләнеү; **подгото́виться к отъе́зду** китеүгә әҙерләнеп ҡуйыу

**ПОДГОТО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **подгото́вить** — **подготовля́ть** — **подгота́вливать**, **подгото́виться** — **подготовля́ться** — **подгота́вливаться**; **подгото́вка уро́ков** дәрес әҙерләү **2.** (*запас знаний*) әҙерлек

**ПОДГОТО́ВЛЕННОСТЬ** *ж* әҙерләнгәнлек, әҙерлеклек; **подгото́вленность ка́дров** кадрҙарҙың әҙерлеклеге

**ПОДГОТОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **подгото́вить**

**ПОДГОТОВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подгото́виться 2.** *страд. от* **подготовля́ть**

**ПОДГРЕБА́ТЬ** *несов. см.* **подгрести́**

**ПОДГРЕСТИ́** *сов.* **1.** *что* көрәп өйөп (йыйып) ҡуйыу; (*сено*) тырмап өйөү (килтереү) **2.** ишеп яҡынлау, ишеп килеп туҡтау; **подгрести́ к бе́регу** ишеп ярға яҡынлау

**ПОДГРУ́ДОК** *м* муйын аҫты (*ҡайһы бер хайуандарҙың муйын аҫтында аҫылынып торған тире*)

**ПО́ДГРУЗДЬ** *м* ҡарағай бәшмәге

**ПОДГРУ́ППА** *м* төркөмсә

**ПОДГУ́ЗНИК** *м* аҫлыҡ, бала сепрәге, бәләкәй йүргәк

**ПОДГУЛЯ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ҡыҙмасаланыу, ҡыҙмаса булып алыу

**ПОДДАВА́ТЬ** *несов. см.* **подда́ть**

**ПОДДАВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **подда́ться**

**ПОДДАВКИ́** *только мн.*; *разг.* бирешле уйын (*кем шашкаһын алдараҡ биреп бөтә, шул еңә*)

**ПОДДА́КИВАТЬ** *несов. кому-чему* һүҙен хуплап (йөпләп, эйе тип) тороу; **подда́кивать расска́зчику** һөйләүсенең һүҙен йөпләп тороу

**ПО́ДДАННЫЙ** *м* подданный (*берәй дәүләт гражданлығындағы кеше*)

**ПО́ДДАНСТВО** *с* подданныйлыҡ (*кешенең берәй дәүләттең даими гражданлығын алыуы*); **приня́ть по́дданство** подданныйлыҡ ҡабул итеү; **перемени́ть по́дданство** подданныйлыҡты алмаштырыу

**ПОДДА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чем* юғарыға ырғытыу, сөйөп ебәреү; **подда́ть мяч** тупты сөйөп ебәреү **2.** *чего*; *разг.* өҫтәү, арттырыу,

шәбәйтеү, өҫтәй (арттыра, шәбәйтә) төшөү; **поддáть хóду** аҙымды шәбәйтә төшөү **3.** *что*; *разг.* (*в игре*) биреү, ашатыу; **поддáть пéшку** пешканы ашатыу ♦ **поддáть гáзу** газ өҫтәй төшөү (*двигателдең әйләнеш һанын һәм ҡеүәтен ҡубәйтеп, тиҙлекте шәбәйтеү*); **поддáть жáру (пáру)** *прост.* дәрт менән эшләп китеү, ҡыҙыуыраҡ эшләй башлау

**ПОДДÁТЬСЯ** *сов. кому-чему* и *без. доп.*; *в разн. знач.* бирешеү, бирелеү; **поддáться на уговóры** димләүҙәргә бирелеү; **поддáться влия́нию** йоғонтоға бирелеү; **поддáться уны́нию** һағышҡа бирелеү; **поддáться проти́внику** ҡаршы яҡҡа бирешеү; **поддáться дремóте** йоҡоға бирешеү

**ПОДДЕВÁТЬ I** *несов. см.* **поддéть** I

**ПОДДЕВÁТЬ II** *несов. см.* **поддéть** II

**ПОДДЁВКА** *ж* бөрмәле бишмәт (*ирҙәр кейеме*)

**ПОДДÉЛАТЬ** *сов. что* (алдап) яһау, оҡшатып ҡуйыу; **поддéлать докумéнт** ялған документ яһау

**ПОДДÉЛАТЬСЯ** *сов.* **1.** *под кого-что* булырға (оҡшарға, оҡшатырға) тырышыу, булып ҡыланыу; **поддéлаться под чужу́ю речь** башҡа кешегә оҡшатырға тырышып һөйләшеү **2.** *к кому*; *разг.* ярау, ярамһаҡланыу; **поддéлаться к начáльнику** түрәгә ярау

**ПОДДÉЛКА** *ж* **1.** *см.* **поддéлать — поддéлывать 2.** ялған (оҡшатып яһалған) нәмә; **поддéлка под жéмчуг** ынйыға оҡшатып яһалған нәмә

**ПОДДÉЛЫВАТЬ** *несов. см.* **поддéлать**

**ПОДДÉЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **поддéлаться 2.** *страд. от* **поддéлывать**

**ПОДДÉЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ялған, яһалма; **поддéльный докумéнт** ялған документ; **поддéльные цветы́** яһалма сәскәләр

**ПОДДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **поддёрнуть**

**ПОДДЕРЖÁТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тотоп алыу; **поддержáть больнóго пóд руку** ауырыуҙы ҡултығынан тотоп алыу **2.** *кого-что* (*помочь*) ярҙам итеү, булышыу; **поддержáть дру́га** дуҫҡа ярҙам итеү **3.** *кого-что* (*выступить в защиту*) яҡлау, хуплау; **поддержáть предложéние** тәҡдимде яҡлау **4.** *что* (*не дать прекратиться, нарушиться*) туҡтатмау, өҙмәү, дауам иттереү, һаҡлау, тотоу; **поддержáть разговóр** һөйләшеүҙе дауам иттереү; **поддержáть огóнь** утты өҙмәү; **поддержáть поря́док** тәртип тотоу (һаҡлау); **поддержáть знакóмство** танышлыҡты туҡтатмау

**ПОДДÉРЖИВАНИЕ** *с см.* **поддéрживать**; **поддéрживание свя́зей** бәйләнештәрҙе өҙмәү

**ПОДДÉРЖИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **поддержáть 2.** *что* тотоп тороу; **бáлки поддéрживают потолóк** түшәмде өрләктәр тотоп тора

**ПОДДÉРЖКА** *ж* **1.** *см.* **поддержáть — поддéрживать 2.** ярҙам (булышлыҡ); **оказáть поддéржку** ярҙам итеү **3.** *прям.*, *перен.* (*опора*) таяныс, терәк; **сын — моя́ поддéржка** улым — минең таянысым

**ПОДДЁРНУТЬ** *сов. что*; *разг.* күтәрә төшөү, тартып (күтәреп) ҡуйыу; **поддёрнуть голени́ща сапóг** итек ҡуныстарын күтәрә төшөү

**ПОДДÉТЬ I** *сов.* **1.** *кого-что* (*зацепив, приподнять*) сәнсеп элеп алыу, эләктереп алыу; **поддéть кры́шку** ҡапҡасты эләктереп алыу **2.** *кого-что* и *без. доп.*; *перен.*, *разг.* (һүҙ менән) төрттөрөп (сәнсеп) алыу; **поддéть в разговóре** *кого-л. кемгәләр* һөйләшкәндә төрттөрөп алыу

**ПОДДÉТЬ II** *сов. что* эстән кейеү; **поддéть сви́тер под пальтó** пальто эсенән свитер кейеү

**ПОДДРÁЗНИВАТЬ** *несов. см.* **поддразни́ть**

**ПОДДРАЗНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* үсектереү, үсектереп (ирештереп) алыу

**ПОДДУВÁЛО** *с* еллек (*мейестә*)

**ПОДДУВÁТЬ** *несов. безл.* өрөңкөрәү, бер аҙ (әҙерәк) өрөү; **от окнá поддувáет** тәҙрәнән бер аҙ өрә

**ПОДÉЙСТВОВАТЬ** *сов. см.* **дéйствовать** 3; **лекáрство хорошó подéйствовало** дарыу яҡшы тәьҫир итте

**ПОДЕКÁДНЫЙ,** -ая, -ое ун көн һайын булған, ун көнгә бер булған; **подекáдный отчёт** ун көнгә бер булған отчёт

**ПОДÉЛАТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** эшләп тороу (алыу); **подéлать гимнáстику** гимнастика эшләп алыу; **подéлать óпыты** тәжрибәләр эшләп тороу **2.** (*сделать всё, многое*) эшләп ҡуйыу (сығыу); **подéлать все рáмы** бөтә ҡыҫандарҙы эшләп ҡуйыу ♦ **что (же) подéлать (подéлаешь)** ни эшләргә (эшләйһең) инде; **ничегó не подéлаешь** *см.* **ничтó**

**ПОДЕЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** бүлеү, бүлешеү, бүлгеләү, бүлеп биреү; **подели́ть добы́чу** табыш бүлгеләү **2.** (*пережить вместе с кем-л.*) бүлешеү, уртаҡлашыу

**ПОДЕЛИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **дели́ться** 3, 5; **дéти подели́лись конфéтами** балалар кәнфиттәрен бүлеште; **подели́ться рáдостью** шатлыҡ уртаҡлашыу

**ПОДÉЛКА** *ж* **1.** *обычно мн.* **подéлки** (*мелкая работа*) ваҡ-төйәк эш; **занимáться подéлками** ваҡ-төйәк эш менән булыу **2.** (*мелкое изделие, изготовленное ручным способом*) ваҡ-төйәк нәмәләр; **подéлки из кóсти** һөйәктән эшләнгән ваҡ-төйәк нәмәләр

**ПОДЕЛÓМ** *нареч.*; *разг.* шул кәрәк, үҙенә күрә таман; **поделóм емý** уға шул кәрәк

**ПОДÉЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* ваҡ-төйәккә (ваҡ-төйәк эшкә, ваҡ-төйәк нәмә яһауға) китә торған; **подéлочное дéрево** ваҡ-төйәк нәмә яһауға китә торған ағас

**ПОДÉЛЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* эшләштереү, эш бөтөрөү; **что подéлываете?** ни эш бөтөрәһегеҙ?

**ПОДЁНКА** *ж* һыу мыры

**ПОДЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** көнлөк; **подённая плáта** көнлөк түләү; **подённая рабóта** көнлөк эш **2.** *в знач. сущ.* **подённая** *ж*; *разг.* (*временная*

*работа*) көнлөк; **нанима́ться на подённую** көнлөккә ялланыу **3.** *в знач. сущ.* **подённый** *м* (*временный рабочий*) көнлөксө; **подённого наня́ть** көнлөксө яллау

**ПОДЁНЩИК** *м* и **ПОДЁНЩИЦА** *ж* көнлөксө; **нанима́ться подёнщиком** көнлөксө булып ялланыу

**ПОДЁНЩИНА** *ж* көнлөк; **выходи́ть на подёнщину** көнлөккә сығыу

**ПОДЁРГАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, чем, за что* тартҡылау, тартҡыслау, тартҡылап ҡуйыу; **подёргать за во́лосы** сәстән тартҡылау **2.** *что; разг.* (*выдернуть всё, многое*) тартып (һурып) бөтөрөү (сығыу); **подёргать все гво́зди** бөтә сөйҙө һурып сығыу

**ПОДЁРГИВАНИЕ** *с см.* **подёргивать, подёргиваться**

**ПОДЁРГИВАТЬ** *несов.* **1.** *за что* тартҡылау, тартҡыслау, тартҡылап ҡуйыу; **подёргивать за коне́ц верёвки** бау осон тартҡыслау **2.** *чем* һикерткеләп (һикертеп) ҡуйыу; **подёргивать бро́вью** ҡаш һикерткеләп ҡуйыу **3.** *безл.* ҡалтыраныу, тартышыу; **гу́бы его́ подёргивало** ирендәре тартышты

**ПОДЁРГИВАТЬСЯ** *несов.* тартышыу, ҡалтыраныу; **не́рвно подёргиваться** ғасабиланып ҡалтыраныу

**ПОДЕРЖА́НИЕ: на подержа́ние** ҡулланып (тотоноп) тороуға; **взять на подержа́ние** ҡулланып тороуға алыу

**ПОДЕ́РЖАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **подержа́ть 2.** *прил.* тотонолған, ҡулланылған; **магази́н поде́ржанных веще́й** тотонолған әйберҙәр магазины

**ПОДЕРЖА́ТЬ** *сов. кого-что* тотоп тороу, (бер аҙ) тотоу; **подержа́ть ребёнка** баланы тотоп тороу; **подержа́ть о́кна откры́тыми** тәҙрәләрҙе бер аҙ асыҡ тотоу

**ПОДЕРЖА́ТЬСЯ** *сов.* (күпмелер) тотоноп тороу, (бер аҙ) тороу

**ПОДЁРНУТЬ** *сов. что, чем* ҡаплау, ябыу; **ре́ку подёрнуло льдом** йылғаны боҙ ҡаплаған

**ПОДЁРНУТЬСЯ** *сов. чем* ҡапланыу, ябылыу

**ПОДЕШЕВЕ́ТЬ** *сов.* арзаная (осһоҙлана) төшөү

**ПОДЖА́РИВАНИЕ** *с см.* **поджа́ривать**

**ПОДЖА́РИВАТЬ** *несов. см.* **поджа́рить**

**ПОДЖА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **поджа́риться 2.** *страд. от* **поджа́ривать**

**ПОДЖА́РИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* ҡыҙарып (ҡыҙыуҙа) бешкән, яҡшы ҡыҙҙырылған; **поджа́ристая ко́рка хле́ба** ҡыҙарып бешкән икмәк ҡыртышы **2.** *уст. см.* **поджа́рый**

**ПОДЖА́РИТЬ** *сов. что, чего* ҡура (ҡыҙҙыра) биреү, ҡурыу, ҡыҙҙырыу; **поджа́рить мя́со** итте ҡура төшөү; **поджа́рить карто́шки** картуф ҡыҙҙырыу

**ПОДЖА́РИТЬСЯ** *сов.* ҡурылып (ҡыҙҙырылып) етеү; **мя́со поджа́рилось** ит ҡурылып еткән

**ПОДЖА́РКА** *ж* **1.** *см.* **поджа́рить — поджа́ривать 2.** (*кушанье*) ҡурҙаҡ (*йоҡа телемләп ҡурылған ит*)

**ПОДЖА́РЫЙ,** -ая, -ое сандыр, асҡаҡ; **поджа́рое те́ло** сандыр кәүҙә

**ПОДЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*ноги, колени*) бөкләү; (*губы*) ҡымтыу; (*хвост*) ҡыҫыу; **поджа́ть под себя́ но́ги** аяҡ бөкләп ултырыу **2.** (*прижать, придавить*) ҡыҫырыҡлау, юлын быуыу; **поджа́ть к бо́рту** бортҡа ҡыҫырыҡлау ♦ **поджа́ть хвост** ҡойроғон ҡыҫыу, шым булыу

**ПОДЖЕЛУ́ДОЧНЫЙ: поджелу́дочная железа́** *анат.* ашҡаҙан аҫты биҙе, йоҡолоҡ; **поджелу́дочный сок** *анат.* ашҡаҙан аҫты биҙенең һуты

**ПОДЖЕ́ЧЬ** *сов. что* **1.** ҡабыҙыу, тоҡандырыу, яндырып ебәреү; **подже́чь дрова́** утынды яндырып ебәреү **2.** ут төртөү, үрт һалыу; **подже́чь сара́й** һарайға ут төртөү

**ПОДЖИВА́ТЬ** *несов. см.* **поджи́ть**

**ПОДЖИГА́ТЕЛЬ** *м* и **ПОДЖИГА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* **1.** ут төртөүсе, үрт һалыусы, үртәүсе **2.** *перен.* ҡотортоусы, башлап ебәреүсе, тоҡандырыусы; **поджига́тели войны́** һуғыш тоҡандырыусылар

**ПОДЖИГА́ТЬ** *несов. см.* **подже́чь**

**ПОДЖИДА́ТЬ** *несов. кого-что, кого-чего; разг.* көтөп тороу; **поджида́ть го́стя** ҡунаҡты көтөп тороу

**ПОДЖИ́ЛКИ** *только мн.; разг.* тубыҡ тарамышы (һеңере) ♦ **поджи́лки трясу́тся** тубыҡ ҡалтырай (*ҡурҡыуҙан, тулҡынланыуҙан*)

**ПОДЖИМА́ТЬ** *несов. см.* **поджа́ть**

**ПОДЖИ́ТЬ** *сов.; разг.* бөтәшә башлау, уңала биреү (төшөү); **ра́на поджила́** яра уңала төшкән

**ПОДЖО́Г** *м* ут төртөү, үрт һалыу, үртәү

**ПОДЗАБЫВА́ТЬ** *несов. см.* **подзабы́ть**

**ПОДЗАБЫ́ТЬ** *сов. кого-что; разг.* онотоп ебәреү, онота төшөү (биреү)

**ПОДЗАГОЛО́ВОК** *м* өҫтәмә исем (*китапта*)

**ПОДЗАДО́РИВАТЬ** *несов. см.* **подзадо́рить**

**ПОДЗАДО́РИТЬ** *сов. кого; разг.* ҡотортоу, сәмләндереү

**ПОДЗАРАБО́ТАТЬ** *сов. что, чего* и *без доп.; разг.* (бер аҙ) аҡса эшләп алыу

**ПОДЗАТЫ́ЛЬНИК** *м; разг.* елкә төбөнә ҡундырыу (тондороу); **дать подзаты́льник** *кому-л.* *берәйһенең* елкә төбөнә ҡундырыу

**ПОДЗАЩИ́ТНЫЙ** *м* и **ПОДЗАЩИ́ТНАЯ** *ж* яҡланыусы, яҡлана торған кеше

**ПОДЗЕМЕ́ЛЬЕ** *с* ер аҫты ҡыуышлығы

**ПОДЗЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* ер аҫты …ы, ер аҫтындағы; **подзе́мный перехо́д** ер аҫты юлы, ер аҫты үткеле, үткәүел; **подзе́мные рабо́ты** ер аҫты эштәре; **подзе́мные во́ды** ер аҫты һыуҙары

**ПОДЗЕРКА́ЛЬНИК** *м* көҙгө аҫты, көҙгө өҫтәле (*ҙур көҙгө аҫтына ҡуйыу өсөн*)

**ПОДЗО́Л** *м* (*почва*) көлһыу тупраҡ

**ПОДЗО́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое көлһыу; **подзо́листая по́чва** көлһыу тупраҡ

**ПОДЗО́Р** *м* **1.** (*кружевная кайма по краю чего-л.*) селтәр, ҡайма; **покрыва́ло с подзо́ром** селтәрле япма (йәймә) **2.** *архит.* һырлы кәрниз, селтәр кәрниз; **о́кна с подзо́рами** селтәрле кәрнизле тәҙрәләр

**ПОДЗО́РНЫЙ,** -ая, -ое күҙәтеү ...ы; **подзо́рная труба́** күҙәтеү торбаһы

**ПОДЗУДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* ҡотортоу

**ПОДЗУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **подзуди́ть**

**ПОДЗЫВА́ТЬ** *несов. см.* **подозва́ть**

**ПОДИ́** *разг.* **1.** *повел. от* **пойти́**; **поди́ сюда́** кил бында; **поди́ прочь** кит бынан **2.** *вводн. сл.* (*вероятно, пожалуй*) ихтимал, моғайын; **ты, поди́, всю рабо́ту уже́ сде́лал** һин, моғайын, бөтә эшеңде эшләгәнһеңдер әле

**ПОДИВИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ғәжәпләндереү, ғәжәпкә (таң, хайран) ҡалдырыу

**ПОДИВИ́ТЬСЯ** *сов. кому-чему, на кого-что*; *разг.* ғәжәпләнеү, ғәжәпкә (таң, хайран) ҡалыу

**ПОДИРА́ТЬ** *несов. кого-что* и *без доп.*; *разг.* семеттереү, сымырлатыу ♦ **моро́з по ко́же подира́ет** *см.* **моро́з**

**ПОДКА́ЛЫВАНИЕ** *с см.* **подка́лывать**

**ПОДКА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **подколо́ть**

**ПОДКА́ПЫВАНИЕ** *с см.* **подка́пывать, подка́пываться**

**ПОДКА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **подкопа́ть**

**ПОДКА́ПЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подкопа́ться 2.** *страд. от* **подка́пывать**

**ПОДКАРАУ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **подкарау́лить**

**ПОДКАРАУ́ЛИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* һағалап (аңдып) көтөү

**ПОДКА́РМЛИВАНИЕ** *с см.* **подка́рмливать**

**ПОДКА́РМЛИВАТЬ** *несов. см.* **подкорми́ть**

**ПОДКА́РМЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подкорми́ться 2.** *страд. от* **подка́рмливать**

**ПОДКАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тәгәр(л)әтеп килтереү; **подкати́ть бо́чку к маши́не** мискәне машина янына тәгәрләтеп килтереү **2.** *разг.* (*быстро подъехать*) елдереп (осортоп, саптырып) килеп туҡтау; **к до́му подкати́ла маши́на** өй янына машина елдереп килеп туҡтаны **3.** *обычно безл.*; *разг.* (*о боли и т.п.*) (тамаҡҡа, йөрәккә) тығылыу (төйөләү); **подкати́ло к го́рлу** тамаҡҡа төйөлдө

**ПОДКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тәгәр(л)әп килеп етеү, тәгәр(л)әп инеп китеү; **мяч подкати́лся под стол** туп өҫтәл аҫтына тәгәрләп инеп китте **2.** *см.* **подкати́ть** 2

**ПОДКА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **подкати́ть**

**ПОДКА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подкати́ться 2.** *страд. от* **подка́тывать**

**ПОДКАЧА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* һурҙыра биреү, (бер аҙ) һурҙырыу; **подкача́ть воды́ в котёл** ҡаҙанға бер аҙ һыу һурҙырыу **2.** *прост.* һынатыу; **он не подкача́л, про́сьбу вы́полнил** ул һынатманы, үтенесте башҡарҙы

**ПОДКА́ЧИВАНИЕ** *с см.* **подка́чивать**

**ПОДКА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **подкача́ть** 1

**ПОДКА́ШИВАНИЕ** *с см.* **подка́шивать** 1

**ПОДКА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **подкоси́ть**

**ПОДКА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подкоси́ться 2.** *страд. от* **подка́шивать** 1

**ПОДКА́ШЛИВАНИЕ** *с*; *разг. см.* **подка́шливать**

**ПОДКА́ШЛИВАТЬ** *несов.*; *разг.* тамаҡ ҡырғылау

**ПОДКИДНО́Й,** -ая, -ое **1.** юғарыға ташлай (сөйә) торған; **подкидна́я доска́** юғарыға сөйә торған таҡта (*мәҫ., циркта*) **2.** *в знач. сущ.* **подкидно́й** *м см.* **подкидно́й дура́к** ♦ **подкидно́й дура́к** ташлаш уйын, подкидной

**ПОДКИ́ДЫВАНИЕ** *с см.* **подки́дывать**

**ПОДКИ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **подки́нуть**

**ПОДКИ́ДЫШ** *м* ташландыҡ бала

**ПОДКИ́НУТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*подбросить вверх*) сөйөү, һикертеү, юғары ырғытыу; **подки́нуть мяч** туп сөйөү **2.** *разг.* (*вскинуть*) кинәт күтәреп (ташлап) ебәреү; (*о животных*) артын һикертеп ебәреү **3.** *что, чего* өҫтәү, өҫтәй төшөү, өҫтәп ебәреү; **подки́нуть дров в печь** мейескә утын өҫтәп ебәреү **4.** (*тайком подложить*) ташлап (ҡалдырып) китеү, килтереп ташлау; **подки́нуть письмо́** хат ҡалдырып китеү

**ПОДКЛА́ДКА** *ж* **1.** эслек, аҫтар; **подкла́дка пальто́** пальто эслеге **2.** (*предмет, подкладываемый под что-л.*) тыйғыс **3.** *перен.* (*подоплёка*) йәшерен сәбәп

**ПОДКЛАДНО́Й,** -ая, -ое аҫҡа ҡуйыла (һалына) торған, аҫҡа һалмалы; **подкладно́й брус** аҫҡа һалына торған бурса

**ПОДКЛА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое эслек, аҫтарлыҡ; **подкла́дочные тка́ни** эслек туҡымалар

**ПОДКЛА́ДЫВАНИЕ** *с см.* **подкла́дывать**

**ПОДКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **подложи́ть**

**ПОДКЛА́СС** *м*; *биол.* ярым класс (*хайуандар һәм үҫемлектәр системаһындағы класс төркөмсәһе*)

**ПОДКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **подкле́ить**

**ПОДКЛЕ́ИТЬ** *сов. что* йәбештереү, йәбештереп ҡуйыу (сығыу); **подкле́ить подо́шву** олтан йәбештереп ҡуйыу; **подкле́ить разо́рванную страни́цу кни́ги** китаптың йыртылған битен йәбештереп ҡуйыу

**ПОДКЛЕ́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **подкле́ить — подкле́ивать 2.** *разг.* йәбештерелгән нәмә; **бума́жная подкле́йка переплёта** китап тышлығына йәбештерелгән ҡағыҙ

**ПОДКЛЕ́ТЬ** *ж* и **ПОДКЛЕ́Т** *м*; *архит.* аҫҡы өй (ҡат) (*ғәҙәттә, кеше йәшәмәй торған*); **подкле́т це́ркви** сиркәүҙең аҫҡы ҡаты

**ПОДКЛЮЧА́ТЬ** *несов. см.* **подключи́ть**

**ПОДКЛЮЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подключи́ться 2.** *страд. от* **подключа́ть**

**ПОДКЛЮЧЕ́НИЕ** *с см.* **подключи́ть — подключа́ть**

**ПОДКЛЮЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тоташтырыу, индереү, ҡуйыу, үткәреү; **подключи́ть телефо́н** телефон үткәреү; **подключи́ть газ** газ индереү **2.** *кого-что*; *разг.* ҡушыу, килтереп ҡушыу; **подключи́ть к рабо́те мастеро́в** эшкә оҫталарҙы ҡушыу

**ПОДКЛЮЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тоташыу; **подключи́ться к телефо́нной се́ти** телефон селтәренә тоташыу **2.** *разг.* (*стать участником*) ҡушылыу, ҡушылып китеү; **подключи́ться к прое́кту** проектҡа ҡушылыу

**ПОДКЛЮЧИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* умрау аҫты ...ы; **подключи́чная арте́рия** умрау аҫты артерияһы

**ПОДКО́ВА** *ж* даға; **ме́дная подко́ва** еҙ даға; **сапо́жные подко́вы** итек дағалары; **приби́ть подко́ву** даға ҡағыу

**ПОДКОВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** дағалау; **подкова́ть ло́шадь** ат дағалау **2.** *перен.*, *разг.* (*дать запас знаний*) әҙерләү, белемен ныҕытыу

**ПОДКОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* мәғлүмәтле (белемле) булыу, әҙерлек алыу

**ПОДКО́ВНЫЙ,** -ая, -ое даға ...ы; **подко́вный след** даға эҙе; **подко́вный гвоздь** даға ҡаҙауы

**ПОДКОВООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое даға рәүешендәге (кеүек), дағаға оҡшаш; **подковообра́зный магни́т** даға рәүешендәге магнит

**ПОДКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **подкова́ть**

**ПОДКО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подкова́ться 2.** *страд. от* **подко́вывать**

**ПОДКОВЫ́РИВАТЬ** *несов. см.* **подковырну́ть**

**ПОДКОВЫ́РКА** *ж*; *разг.* төртмә (сәнскеле, төртмәле) һүҙ; **слова́ с подковы́ркой** төртмәле һүҙҙәр

**ПОДКОВЫРНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡуптарып алыу, соҡоп сығарыу; **подковырну́ть коро́сту** ҡутырҙы ҡуптарып алыу **2.** *кого-что*; *перен.* төрттөрөү, сәнскеле (төртмәле) һүҙ әйтеү

**ПОДКО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тире аҫтындағы; **подко́жный слой жи́ра** тире аҫтындағы май ҡатламы; **подко́жная клетча́тка** тире аҫтындағы күҙәнәклек **2.** (*производимый под кожу*) тире аҫтына (торған); **подко́жное впры́скивание** тире аҫтына дарыу ебәреү

**ПОДКОЛЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *анат.* тубыҡ аҫтындағы; **подколе́нная я́мка** тубыҡ аҫтындағы соҡор; **подколе́нные мы́шцы** тубыҡ аҫтындағы мускулдар

**ПОДКОЛО́ДНЫЙ: змея́ подколо́дная** *бран.* ҡара йылан (*мәкерле кешегә ҡарата*)

**ПОДКОЛО́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡаҙап (ҡыҫтырып, ҡайтарып) ҡуйыу; **подколо́ть подо́л** итәкте ҡыҫтырып ҡуйыу; **подколо́ть ко́су** толомдо ҡаҙап ҡуйыу **2.** *что* теркәп ҡуйыу; **подколо́ть спра́вку к заявле́нию** белешмәне ғаризаға теркәп ҡуйыу **3.** *кого* и *без. доп.*; *перен.* төрттөрөп (һүҙ менән сәнсеп) алыу

**ПОДКОМИ́ССИЯ** *ж* ярҙамсы комиссия

**ПОДКОНТРО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое контроллегендәге, контроль аҫтындағы, контролгә алынған; **подконтро́льные министе́рству о́рганы** министрлыҡ контроллегендәге органдар

**ПОДКО́П** *м* **1.** *см.* **подкопа́ть — подка́пывать**, **подкопа́ться — подка́пываться 2.** ер аҫты юлы (*ҡаҙып эшләнгән*); **подко́п под крепостно́й стено́й** ҡәлғә диуары аҫтынан үткән ер аҫты юлы **3.** *перен.*, *разг.* (*козни*) соҡор (ҡаҙыу), тоҙаҡ (ҡороу)

**ПОДКОПА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*подрыть*) аҫтан (аҫтын, төбөн) ҡаҙыу; **подкопа́ть столб** бағана төбөн ҡаҙыу **2.** *разг.* (*вырыть часть клубней от куста, напр., картофеля*) юллап алыу

**ПОДКОПА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *подо что* (аҫтына ҡаҙып) инеү; **крот подкопа́лся под де́рево** һуҡыр сысҡан ағас аҫтын ҡаҙып ингән **2.** *под кого*; *перен.*, *разг.* соҡоноу, ғәйеп эҙләү

**ПОДКО́РМ** *м* **1.** *см.* **подкорми́ть — подка́рмливать 2.** өҫтәмә аҙыҡ; **жи́дкий подко́рм** шыйыҡ өҫтәмә аҙыҡ

**ПОДКОРМИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого*; *разг.* ашатып (туйындырып) алыу; **подкорми́ть ребёнка** баланы ашатып алыу **2.** *что*; *с.-х.* өҫтәмә туҡландырыу (ашлама индереү); **подкорми́ть ози́мые** ужымдарҙы өҫтәмә туҡландырыу

**ПОДКОРМИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ашап (туйынып) алыу

**ПОДКО́РМКА** *ж* **1.** *см.* **подкорми́ть — подка́рмливать 2.** *см.* **подко́рм** 2

**ПОДКОРОТИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* ҡыҫҡарта төшөү; **подкороти́ть пла́тье** күлдәкте ҡыҫҡарта төшөү

**ПОДКО́С I** *м*; *разг. см.* **подкоси́ть — подка́шивать** 1; **подко́с травы́** үлән сабыу

**ПОДКО́С II** *м*; *тех.* терәү, таяу; **подко́с стропи́ла** атлама таяуы

**ПОДКОСИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (салғы менән) сабыу, сабып ташлау; **подкоси́ть сорняки́** сүп үләндәрен сабып ташлау **2.** *кого* аяҡтан йығыу; **пу́ля его́ подкоси́ла** пуля уны аяҡтан йыҡты **3.** *кого-что*; *перен.* хәлдән тайҙырыу, аяҡтан йығыу; **го́ре его́ подкоси́ло** ҡайғы уны аяҡтан йыҡты

**ПОДКОСИ́ТЬСЯ** *сов.* быуын бушау (*аяҡҡа ҡарата*); **но́ги подкоси́лись от стра́ха** ҡурҡыуҙан аяҡ быуындары бушаны

**ПОДКРА́ДЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **подкра́сться**

**ПОДКРА́СИТЬ** *сов. что* **1.** әҙерәк (еңелсә, бер аҙ) бурап алыу (ебәреү); **подкра́сить гу́бы**

иренде бер аҙ буяп ебәреү **2.** (*добавочно подкрасить*) буяп ҡуйыу, буяуын яңыртыу

**ПОДКРА́СИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* еңелсә (бер аҙ) буяныу (биҙәнеү)

**ПОДКРА́СТЬСЯ** *сов.* **1.** һиҙҙермәйенсә килеү (барыу), боҫоп килеү (барыу); **подкра́сться к окну́** тәҙрә янына һиҙҙермәйенсә килеү **2.** *перен.* көтмәгәндә килеп етеү (*берәй күренеш, ваҡиға һ.б. ҡарата*); **зима́ подкра́лась незаме́тно** ҡыш һиҙҙермәй генә килеп етте

**ПОДКРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **подкра́сить**

**ПОДКРА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подкра́ситься 2.** *страд. от* **подкра́шивать**

**ПОДКРЕПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* нығытыу; **подкрепи́ть забо́р подпо́ркой** ҡойманы терәү менән нығытыу **2.** *кого-что* нығытыу, көсләндереү, хәлләндереү, хәл индереү; **сон подкрепи́л больно́го** йоҡо ауырыуға хәл индерҙе **3.** *что, чем*; *перен.* нығытыу, иҫбатлау, дәлилләү; **подкрепи́ть своё заключе́ние приме́рами** үҙеңдең һығымтаңды миҫалдар менән нығытыу

**ПОДКРЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* ашап (тамаҡ ялғап) алыу; **подкрепи́ться пе́ред доро́гой** юлға сығыр алдынан ашап алыу

**ПОДКРЕПЛЕ́НИЕ** *с см.* **1. подкрепи́ть** — **подкрепля́ть**, **подкрепи́ться** — **подкрепля́ться 2.** (*о людских резервах*) өҫтәмә көс, ярҙам

**ПОДКРЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **подкрепи́ть**

**ПОДКРЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подкрепи́ться 2.** *страд. от* **подкрепля́ть**

**ПОДКРУТИ́ТЬ** *сов. что* бора биреү (төшөү), әҙерәк (бер аҙ) бороу; **подкрути́ть га́йку** гайканы бора биреү

**ПОДКРУТИ́ТЬСЯ** *сов.* борола биреү, бер аҙ (әҙерәк) боролоу

**ПОДКРУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **подкрути́ть**

**ПОДКРУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подкрути́ться 2.** *страд. от* **подкру́чивать**

**ПОДКУЗЬМИ́ТЬ** *сов. кого*; *прост.* аҫтан ҡырҡыу, ҡыйын хәлдә ҡалдырыу

**ПОДКУЛА́ЧНИК** *м*; *ист.* кулак ҡуштаны (эйәрсәне)

**ПО́ДКУП** *м см.* **подкупи́ть** — **подкупа́ть** 1

**ПОДКУПА́ТЬ** *несов. см.* **подкупи́ть**

**ПОДКУПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һатып алыу (*аҡса, бүләк биреп, һыйлап һ.б.*); **подкупи́ть свиде́телей** шаһиттарҙы һатып алыу **2.** *кого-что*; *перен.* үҙенә ҡаратыу (тартыу), үҙ яғына ауҙарыу; **он подкупа́ет доброто́й** ул киң күңеллелеге менән үҙенә ҡарата **3.** *что, чего* тағы бер аҙ (өҫтәмә рәүештә) һатып алыу; **подкупи́ть са́хару** тағы бер аҙ шәкәр һатып алыу

**ПОДКУПНО́Й,** -ая, -ое һатлыҡ, һатыла торған; **подкупно́й свиде́тель** һатлыҡ шаһит

**ПОДКУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **подкури́ть**

**ПОДКУРИ́ТЬ** *сов. кого-что, чего*; *в разн. знач.* (әҙерәк) төтөн ебәреү, төтәҫләп алыу; **подкури́ть пчёл** *пчел.* бал ҡорттарын төтәҫләп алыу

**ПОДЛА́ДИТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (*голос или музыкальный инструмент*) көйләү; **подла́дить скри́пку под роя́ль** скрипканы рояль тауышына көйләү **2.** (*приспособить*) (ыңғайына) яйлау, яраҡлаштырыу **3.** ҡулайлаштырыу, яһап (эшләп) ҡуйыу, тура килтереү; **подла́дить ось к теле́ге** күсәрҙе арбаға ҡулайлаштырыу

**ПОДЛА́ДИТЬСЯ** *сов. к кому-чему* **1.** яйлашыу, яраҡлашыу; **подла́диться к рабо́те напа́рника** иптәшеңдең эшенә яйлашыу **2.** (*приспособиться к кому-чему-л.*) ярау, яраҡлашыу, ярарға (яраҡлашырға) тырышыу **3.** ҡулайлашыу, тура килеү

**ПОДЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **подла́дить**

**ПОДЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подла́диться 2.** *страд. от* **подла́живать**

**ПОДЛА́МЫВАТЬ** *несов. см.* **подломи́ть**

**ПОДЛА́МЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подломи́ться 2.** *страд. от* **подла́мывать**

**ПО́ДЛЕ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* эргәһенә, яҡын, янына; **сесть по́дле** янына ултырыу; **приюти́ться по́дле** яҡын урынлашыу **2.** *предлог с род. п.* (*при обозначении лица, предмета, места, рядом с которым совершается действие*) янына, янында, эргәһенә, эргәһендә, тирәһенә, тирәһендә; **по́дле до́ма** өй эргәһендә; **усади́ть по́дле себя́** үҙ янына ултыртыу

**ПОДЛЁДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** боҙ аҫтындағы; **подлёдная вода́** боҙ аҫтындағы һыу **2.** (*производимый подо льдом*) боҙ аҫты; **подлёдный лов ры́бы** боҙ аҫтынан балыҡ тотоу

**ПОДЛЕЖА́ТЬ** *несов. чему* тейеш(ле) булыу; **подлежа́ть учёту** иҫәпкә алынырға тейешле ♦ **не подлежи́т сомне́нию** шикләнергә урын юҡ

**ПОДЛЕЖА́ЩЕЕ** *с*; *грам.* эйә

**ПОДЛЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **подле́зть**

**ПОДЛЕ́ЗТЬ** *сов.* шыуышып (мүкәйләп) инеү; **подле́зть под стол** өҫтәл аҫтына мүкәйләп инеү

**ПОДЛЕ́СОК** *м* ваҡ ағаслыҡ; (*берёзовый*) сауҡалыҡ; (*хвойный*) бешәлек; (*дубовый*) туйралыҡ

**ПОДЛЕ́СЬЕ** *с см.* **подле́сок**

**ПОДЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **подлете́ть**

**ПОДЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** осоп килеү; **пти́ца подлете́ла к гнезду́** ҡош ояға осоп килде **2.** *разг.* (*подбежать, быстро подойти*) йүгереп (осоп) килеп етеү **3.** *разг.* (*взлететь*) һикереү; **мяч подлете́л до потолка́** туп түшәмгә тиклем һикерҙе

**ПОДЛЕ́Ц** *м* әҙәм аҡтығы

**ПОДЛЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **подлечи́ть**

**ПОДЛЕ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подлечи́ться 2.** *страд. от* **подле́чивать**

**ПОДЛЕЧИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* әҙерәк (бер аҙ) дауалау, дауалап алыу, дауалаштырыу; **подлечи́ть ста́рую ра́ну** иҫке яраны дауалап алыу

**ПОДЛЕЧИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* әҙерәк (бер аҙ) дауаланыу (дауаланып алыу), әҙерәк (бер аҙ)

дауалау; **подлечи́ться на куро́рте** шифаханала бер аҙ дауаланыу

**ПОДЛЕ́ЩИК** *м* ҡарағанат, (ваҡ) ҡорман, ҡорбан (*балыҡ*)

**ПОДЛИ́ВА** *ж см.* **подли́вка** 2

**ПОДЛИВА́ТЬ** *несов. см.* **подли́ть**

**ПОДЛИ́ВКА** *ж* **1.** *см.* **подли́ть** — **подлива́ть** **2.** *кул.* аш тәмләткес (*соус*)

**ПОДЛИ́ЗА** *м* и *ж*; *разг.* ялағай, йомаҡай, юха

**ПОДЛИЗА́ТЬ** *сов. что* ялап ҡуйыу

**ПОДЛИЗА́ТЬСЯ** *сов. к кому*; *разг.* ялағайланыу, юхаланыу, йомаҡайланыу

**ПОДЛИ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **подлиза́ть**

**ПОДЛИ́ЗЫВАТЬСЯ I** *несов. см.* **подлиза́ться**

**ПОДЛИ́ЗЫВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **подли́зывать**

**ПО́ДЛИННИК** *м* төп нөсхә

**ПО́ДЛИННОСТЬ** *ж* төп нөсхә (ысын) булыу, дөрөҫлөк; **заве́рить по́длинность по́дписи** ҡултамғаның ысын булыуын раҫлау

**ПО́ДЛИННЫЙ,** -ая, -ое **1.** төп нөсхә, үҙ; **по́длинная по́дпись** үҙ ҡултамғаһы **2.** (*истинный*) ысын; **по́длинный друг** ысын дуҫ; **по́длинный учёный** ысын ғалим

**ПОДЛИ́ТЬ** *сов. что*, *чего* өҫтәп ҡойоу (һалыу); **подли́ть су́пу** аш өҫтәп һалыу ♦ **подли́ть ма́сла в ого́нь** утҡа кәрәсин һибеү (*хаслыҡ мөнәсәбәтен тағы ла киҫкенләштереү*)

**ПО́ДЛИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ҡәбәхәтләнеү, әшәкелек (ҡәбәхәтлек) эшләү

**ПОДЛОВИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.*, *прям.*, *перен.* тотоу, тотоп алыу, аңлап (белеп, эләктереп) алыу; **подлови́ть на сло́ве** *кого-л.* эләктереп алыу

**ПОДЛО́Г** *м* алдап яһау, ялған; **подло́г докуме́нтов** алдап документтар яһау

**ПОДЛОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (аҫтына) һалыу, (аҫтына) ҡуйыу; **подложи́ть поду́шку под го́лову** баш аҫтына мендәр һалыу **2.** *что*, *чего* өҫтәү, өҫтәп һалыу; **подложи́ть дров в печь** мейескә утын өҫтәү **3.** *что* йәшерен һалыу (һалып китеү); **подложи́ть анони́мное письмо́** имзаһыҙ хат һалып китеү

**ПОДЛО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое ялған, алдап яһалған; **подло́жный докуме́нт** ялған документ

**ПОДЛОКО́ТНИК** *м* таянсыҡ (*ултырғыста һ.б.*)

**ПОДЛОМИ́ТЬ** *сов. что* аҫтан һындырыу (һындырып алыу); **подломи́ть сук** ботаҡты аҫтан һындырып алыу

**ПОДЛОМИ́ТЬСЯ** *сов.* (аҫтан) һыныу, сатнау, ватылыу, ярылыу; **лёд подломи́лся под нога́ми** баҫып торған ерҙә боҙ ватылды ♦ **но́ги подломи́лись** теҙ быуындары йомшаны

**ПО́ДЛОСТЬ** *ж*; *в разн. знач.* әшәкелек, ҡәбәхәтлек, этлек; **сде́лать по́длость** әшәкелек эшләү; **не идти́ на по́длость** этлеккә бармау

**ПО́ДЛЫЙ,** -ая, -ое әшәке, ҡәбәхәт; **по́длый посту́пок** әшәке ҡылыҡ

**ПОДМА́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* (*слегка смазать*) әҙерәк (бер аҙ) һөртөү (майлау, һылау) **2.** *кого*; *перен.*, *прост.* (*дать взятку*) майлау, ришүәт биреү

**ПОДМА́ЗАТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*подкраситься*) буяныу, яғыныу **2.** *к кому-чему*; *перен.*, *прост.* һырпаланыу, ярамһаҡланыу

**ПОДМА́ЗКА** *ж см.* **подма́зать** — **подма́зывать**

**ПОДМА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **подма́зать**

**ПОДМА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подма́заться** **2.** *страд. от* **подма́зывать**

**ПОДМАЛЕВА́ТЬ** *сов. что*; *прост.* **1.** әҙерәк (еңелсә, бер аҙ) буяп алыу (ебәреү) **2.** (*добавочно подкрасить*) буяп ҡуйыу, буяуын яңыртыу

**ПОДМА́НИВАТЬ** *несов. см.* **подмани́ть**

**ПОДМАНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ымлап (ҡыҙыҡтырып) саҡырып килтереү; **подмани́ть ребёнка** баланы ымлап саҡырып килтереү

**ПОДМАРЕ́ННИК** *м* бөрмәкәй, ҡыҙыл тамыр; **подмаре́нник весе́нний** яҙғы бөрмәкәй

**ПОДМА́СЛИВАТЬ** *несов. см.* **подма́слить**

**ПОДМА́СЛИТЬ** *сов.* **1.** *что* әҙерәк (бер аҙ) майлау, май өҫтәү (һала биреү); **подма́слить ка́шу** бутҡаға май өҫтәү **2.** *кого*; *перен.*, *прост.* майлау, ришүәт биреү

**ПОДМАСТЕ́РЬЕ** *м* оҫта ярҙамсыһы, өйрәнсек

**ПОДМА́ХИВАТЬ** *несов. см.* **подмахну́ть**

**ПОДМАХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что*; *разг.* ҡабаланып (уҡып тормаҫтан) ҡул ҡуйыу; **подмахну́ть заявле́ние** ғаризаға уҡып тормаҫтан ҡул ҡуйыу **2.** *прост.* (*наскоро подмести*) (тиҙ генә) һепереп алыу, һеперештереү

**ПОДМА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **подмочи́ть**

**ПОДМЕ́Н** *м* и **ПОДМЕ́НА** *ж* **1.** *см.* **подмени́ть** — **подменя́ть** — **подме́нивать**; **подме́на дежу́рного** дежурҙы алмаштырыу **2.** алмаш; **подме́на пришла́** алмаш килде

**ПОДМЕ́НИВАТЬ** *несов. см.* **подмени́ть**

**ПОДМЕНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (һиҙҙермәҫтән) алмаштырыу; **подмени́ть ка́рту** һиҙҙермәҫтән картте алмаштырыу **2.** *кого*; *разг.* (*временно заменить*) алмаштырып тороу

**ПОДМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **подмени́ть**

**ПОДМЕРЗА́ТЬ** *несов. см.* **подмёрзнуть**

**ПОДМЁРЗНУТЬ** *сов.* **1.** әҙерәк (бер аҙ) туңыу, туңаҙыу, туңа биреү; **са́женцы подмёрзли** үҫентеләр туңа биргән; **земля́ подмёрзла** ер туңаҙыған **2.** *безл.* әҙерәк (бер аҙ) туңдырыу, туңаҙытыу; **на у́лице подмёрзло** урамда бер аҙ туңдырған

**ПОДМЕСИ́ТЬ** *сов. что*, *чего* ҡушып (өҫтәп) баҫыу; **подмеси́ть муки́ в те́сто** ҡамырға он ҡушып баҫыу

**ПОДМЕСТИ́** *сов. что* **1.** (*метя, очистить*) һепереү, һепереп сығарыу; **подмести́ ко́мнату** бүлмәне һепереү **2.** (*метя, собрать что-л.*) һе-

переп алыу (йыйыу); **подмести́ сор** сүпте һепереп алыу

**ПОДМЕТА́ТЬ I** *несов. см.* **подмести́**

**ПОДМЕТА́ТЬ II** *сов. что* типсеү, типсеп сығыу; **подмета́ть подкла́дку к пальто́** пальтоға эслек типсеп сығыу

**ПОДМЕ́ТИТЬ** *сов. кого-что* күреп алыу (ҡалыу); **подме́тить недоста́тки** етешһеҙлектәрҙе күреп алыу

**ПОДМЁТКА** *ж* **1.** *см.* **подмета́ть** II — **подмётывать 2.** олтан; **подмётка сапо́г** итек олтаны ♦ **в подмётки не годи́тся** *кто, кому* тырнағына ла тормай, олтораҡҡа ла ярамай

**ПОДМЁТЫВАТЬ** *несов. см.* **подмета́ть** II

**ПОДМЕЧА́ТЬ** *несов. см.* **подме́тить**

**ПОДМЕША́ТЬ** *сов. что, чего* ҡушып болғатыу (бутау); **подмеша́ть песку́ в цеме́нт** цементҡа ҡом ҡушып бутау

**ПОДМЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **подмеси́ть**

**ПОДМЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **подмеша́ть**

**ПОДМИ́ГИВАНИЕ** *с см.* **подми́гивать**

**ПОДМИ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **подмигну́ть**

**ПОДМИГНУ́ТЬ** *сов. кому* күҙ ҡыҫыу (ҡыҫып ҡуйыу)

**ПОДМИНА́ТЬ** *несов. см.* **подмя́ть**

**ПОДМО́ГА** *ж*; *разг.* ярҙам, булышлыҡ; **идти́ на подмо́гу** ярҙамға килеү

**ПОДМОКА́ТЬ** *несов. см.* **подмо́кнуть**

**ПОДМО́КНУТЬ** *сов.* аҫтан еүешләнеү (дым тартыу, дымланыу); **се́но подмо́кло** бесән аҫтан дымланған

**ПОДМОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **подморо́зить**

**ПОДМОРО́ЗИТЬ** *сов.* **1.** *что* әҙерәк туңдырыу (туңдырып алыу), әҙерәк (бер аҙ) өшөтөү; **подморо́зить мя́со** итте әҙерәк туңдырып алыу **2.** *безл.* әҙерәк (бер аҙ) туңдырыу, туңаҙытыу; **к ве́черу подморо́зило** кискә табан туңаҙытты

**ПОДМО́СТКИ** *только мн.* **1.** (*помост*) түшәмә, һәндерә **2.** (*сцена*) сәхнә; **театра́льные подмо́стки** театр сәхнәһе

**ПОДМО́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **подмочи́ть 2.** *прил.*; *перен., разг.* тапланған, яманаты сыҡҡан, абруйы төшкән; **подмо́ченная репута́ция** яманаты сыҡҡан исем

**ПОДМОЧИ́ТЬ** *сов. что* еүешләү, дымландырыу, сылатыу; **подмочи́ть но́ги** аяҡтарҙы сылатыу

**ПОДМЫВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **подмы́ть 2.** *кого обычно безл.*; *разг.* ҡырсыныу, ҡыҙышыу; **так и подмыва́ет сказа́ть** әйтергә ҡырсынып ҡына тора

**ПОДМЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подмы́ться 2.** *страд. от* **подмыва́ть** 1

**ПОДМЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* бот-сатты йыуыу; **подмы́ть ребёнка** баланың бот-сатын йыуыу **2.** *что*; *разг.* (*наскоро вымыть*) һөртөштөрөп (йыуыштырып) алыу; **подмы́ть пол** иҙәнде һөртөштөрөп алыу **3.** *что* (*размыть*) йыуыу, йыуып өңөү (ашау); **река́ подмы́ла бе́рег** йылға ярын йыуған

**ПОДМЫ́ТЬСЯ** *сов.* йыуынып сайыныу, тәһәрәтләнеү

**ПОДМЫ́ШЕЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡултыҡ аҫты (төбө) ...ы; **подмы́шечная впа́дина** ҡултыҡ аҫты соҡоро

**ПОДМЫ́ШКА** *ж* ҡултыҡ аҫты (төбө)

**ПОДМЫ́ШНИК** *м* ҡултыҡ аҫты кештәге

**ПОДМЯ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прям., перен.* баҫып (өҫтөнә йығылып) иҙеү

**ПОДНАДЗО́РНЫЙ,** -ая, -ое күҙәтеү аҫтындағы, күҙәтеүҙәге

**ПОДНАЖА́ТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *на кого-что* и *без доп.* ныҒыраҡ этеү; **поднажа́ть на дверь** ишекте ныҒыраҡ этеү **2.** *на кого-что* и *без доп.*; *перен.* (*побудить к действию*) ҡыҫмаҡҡа алыу, ҡыҫыу; **поднажа́ть на лентя́ев** ялҡауҙарҙы ҡыҫмаҡҡа алыу **3.** *на что* и *без доп.*; *перен.* (*усерднее приняться за что-л.*) ныҒыраҡ тырышыу, тырыша төшөү

**ПОДНЕБЕ́СЬЕ** *с* күк йөҙө, һауа

**ПОДНЕВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*зависимый*) буйһонған, ирекһеҙ, ҡул аҫтындағы **2.** (*принудительный*) ирекһеҙләп (көсләп) тағылған

**ПОДНЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* яҡын(ыраҡ) килтереү, яҡын(ыраҡ) алып килеү (*ҡулға тотоп, күтәреп*); **поднести́ ребёнка к окну́** баланы тәҙрәгә яҡыныраҡ алып килеү **2.** *что, чего, без доп.* и *с неопр.*; *разг.* (*угостить*) һыйлап биреү (һоноу) **3.** *что, кому* (*подарить*) бүләк итеү (итеп биреү); **поднести́ буке́т цвето́в** сәскә гөлләмәһе бүләк итеү

**ПОДНИМА́ТЬ** *несов. см.* **подня́ть**

**ПОДНИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подня́ться 2.** *страд. от* **поднима́ть**

**ПОДНОВИ́ТЬ** *сов. что* яңырта төшөү (биреү), яңы төҫкә индереү; **поднови́ть кра́ски на карти́не** картинаның буяуҙарын яңырта төшөү

**ПОДНОВИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* яңыра төшөү, яңы төҫкә инеү

**ПОДНОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **поднови́ть**

**ПОДНОВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **поднови́ться 2.** *страд. от* **подновля́ть**

**ПОДНОГО́ТНАЯ** *ж*; *разг.* (ныҡ йәшерелгән) ысын хәл (дөрөҫлөк), дөрөҫө; **знать подного́тную** дөрөҫөн белеү

**ПОДНО́ЖИЕ** *с* **1.** итәк; **подно́жие го́ры** тау итәге **2.** нигеҙ, төп; **положи́ть цветы́ к подно́жию па́мятника** һәйкәл нигеҙенә сәскәләр һалыу; **подно́жие ста́туи** статуяның нигеҙе

**ПОДНО́ЖКА** *ж* **1.** баҫҡыс; **подно́жка трамва́я** трамвай баҫҡысы **2.** *разг.* аяҡ салыу

**ПОДНО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое аяҡ аҫтындағы ♦ **подно́жный корм** аяҡ аҫтындағы аҙыҡ (*үлән*)

**ПОДНО́С** *м* батмус

**ПОДНОСИ́ТЬ** *несов. см.* **поднести́**

**ПОДНО́СЧИК** *м* ташыусы, килтереп тороусы; **подно́счик раство́ра** иҙмә килтереп тороусы

**ПОДНОШЕ́НИЕ** с **1.** *см.* **подноси́ть** 2, 3; **2.** (*подарок*) бүләк

**ПОДНЫ́РИВАТЬ** *несов. см.* **поднырну́ть**

**ПОДНЫРНУ́ТЬ** *сов.* (аҫтына) сумыу, сумып инеү; **поднырну́ть под ло́дку** кәмә аҫтына сумыу

**ПОДНЯ́ТИЕ** *с см.* **подня́ть**, **подня́ться**

**ПОДНЯ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** күтәреү, күтәреп алыу; **подня́ть мешо́к** тоҡто күтәреп алыу; **подня́ть шта́нгу** штанга күтәреү; **подня́ть ребёнка** бала күтәреү **2.** *перен.*, *разг.* (*разобрать в поисках*) ҡарап сығыу; **подня́ть архи́в** архивты ҡарап сығыу **3.** (*переместить наверх*) мендереү, күтәреү; **подня́ть чемода́н на тре́тий эта́ж** сумаҙанды өсөнсө ҡатҡа мендереү **4.** (*сместить вверх*) күтәреү; **подня́ть ру́ку** ҡул күтәреү; **подня́ть воротни́к** яғаны күтәреү; **подня́ть флаг** флаг күтәреү **5.** (*вернуть в прежнее положение*) торғоҙоу, аяҡҡа баҫтырыу; **подня́ть упа́вшего челове́ка** йығылған кешене торғоҙоу; **подня́ть повали́вшийся забо́р** ауған ҡойманы торғоҙоу **6.** (*вылечить*) һауыҡтырыу, аяҡҡа баҫтырыу; **подня́ть больно́го** ауырыуҙы аяҡҡа баҫтырыу **7.** (*наладить*) аяҡҡа баҫтырыу, күтәреү, яҡшыртыу; **подня́ть хозя́йство** хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу **8.** (*побудить к действию*) ҡуҙғатыу, күтәреү; **подня́ть полк в ата́ку** полкты атакаға күтәреү **9.** (*начать действие*) күтәреү, ҡуптарыу, ҡуҙғатыу; **подня́ть шум** тауыш ҡуптарыу; **подня́ть де́ло** *против кого-л. кемгәлер ҡаршы* эш ҡуҙғатыу **10.** (*сделать более высоким*) күтәрә (ҡалҡыта, бейегәйтә) биреү (төшөү); **подня́ть фунда́мент** нигеҙҙе күтәрә биреү; **подня́ть у́ровень воды́** һыуҙың кимәлен күтәрә төшөү **11.** *перен.* (*возвысить*) күтәреү, үҫтереү; **подня́ть в глаза́х люде́й** кешеләр алдында үҫтереп ебәреү **12.** (*повысить*) күтәреү, арттырыу; **подня́ть давле́ние па́ра** парҙың баҫымын арттырыу; **подня́ть урожа́й** уңышты күтәреү; **подня́ть це́ны** хаҡтарҙы күтәреү **13.** *перен.* күтәреү, яҡшыртыу, һәйбәтләндереү (*кәйефте һ.б.*); **подня́ть настрое́ние** кәйефте яҡшыртыу **14.** (*вспахать*) күтәреү, һөрөү; **подня́ть пар** пар күтәреү; **подня́ть целину́** сиҙәм күтәреү ♦ **подня́ть бока́л** *см.* **бока́л**; **подня́ть глаза́** күтәрелеп ҡарау; **подня́ть го́лову** башты юғары тотоу, кәйефләнеү; **подня́ть го́лос** ҡаты әйтеү, ҡырҡа киҫеп әйтеү; **подня́ть меч (ору́жие)** ҡорал күтәреү, ҡорал менән ҡаршы сығыу; **подня́ть на во́здух** һауаға осороу, шартлатыу; **подня́ть на́ смех** *кого* көлкөгә ҡалдырыу; **подня́ть перча́тку** дуэлдә ҡабул итеү

**ПОДНЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** күтәрелеү, менеү; **подня́ться на кры́шу** ҡыйыҡҡа менеү; **подня́ться по ле́стнице** баҫҡыстан менеү; **подня́ться на́ гору** тауға менеү **2.** (*взойти*) күтәрелеү, ҡалҡыу, сығыу; **луна́ подняла́сь** ай ҡалҡты; **тума́н подня́лся** томан күтәрелде **3.** (*встать*) тороу, күтәрелеү, ҡалҡыу; **зато́птанная трава́ бы́стро подняла́сь** тапалған үлән тиҙ ҡалҡты **4.** *разг.* (*выздоровев, начать ходить*) тороу, ҡалҡыу, аяҡҡа баҫыу; **подня́ться по́сле боле́зни** сирҙән һуң аяҡҡа баҫыу **5.** *перен.* аяҡҡа баҫыу, күтәрелеү, яҡшырыу; **хозя́йство подняло́сь** хужалыҡ аяҡҡа баҫты **6.** (*встать с места*) тороу, (аяҡҡа) ҡалҡыу; **подня́ться со сту́ла** ултырғыстан тороу **7.** ҡуҙғалыу, күтәрелеү; **подня́ться в ата́ку** атакаға күтәрелеү **8.** (*начаться*) күтәрелеү, ҡубыу, сығыу; **подняла́сь мете́ль** буран сыҡты **9.** (*стать более высоким*) күтәрелә (ҡалҡа, бейегәйә) төшөү; **фунда́мент подня́лся на два ме́тра** нигеҙ ике метрға ҡалҡа төштө **10.** (*о тесте*) күтәрелеү, ҡалҡыу; **те́сто подняло́сь** ҡамыр күтәрелгән **11.** (*увеличиться*) күтәрелеү, артыу; **производи́тельность труда́ подняла́сь** хеҙмәт етештереүсәнлеге артты; **температу́ра подняла́сь** температура күтәрелде; **це́ны подняли́сь** хаҡтар күтәрелде **12.** *перен.* күтәрелеү, яҡшырыу, һәйбәтләнеү; **настрое́ние подняло́сь** кәйеф яҡшырҙы ♦ **подня́ться на́ ноги**: 1) аяҡҡа баҫыу, һауығыу; 2) үҙ алдына йәшәй башлау

**ПОДО** *предлог см.* **под** II

**ПОДО...** *приставка см.* **под...**

**ПОДОБА́ТЬ** *несов. кому-чему обычно безл.* килешеү, ярау, барыу, тейеш (ятышлы) булыу; **так поступа́ть не подоба́ет** улай ҡыланыу килешмәй

**ПОДОБА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **подоба́ть 2.** *прил.* тейешле, лайыҡлы, ятышлы, килешле; **заня́ть подоба́ющее положе́ние** лайыҡлы урынды алыу

**ПОДО́БИЕ** *с* **1.** *мат.* оҡшашлыҡ, оҡшаған булыу (кеүек, һымаҡ); **подо́бие двух треуго́льников** ике өсмөйөштөң оҡшашлығы **2.** йорат, ишарат; **подо́бие улы́бки** йылмайыу ишараты; **подо́бие челове́ческой фигу́ры** кеше кәүҙәһе ишараты

**ПОДО́БЛАЧНЫЙ,** -ая, -ое болот аҫтындағы, болоттар янындағы

**ПОДО́БНО** *предлог с дат. п.* (*так же, как кто-что-л.*) кеүек, шикелле, һымаҡ

**ПОДО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *кому-чему* (*сходный, похожий*) оҡшаш(лы), кеүек, һымаҡ **2.** былдай, шундай, ундай, быға оҡшаған; **я не чита́л подо́бных стате́й** быға оҡшаған мәҡәләләрҙе уҡығаным юҡ **3.** *мат.* оҡшаш, үҙ-ара оҡшаш булған; **подо́бные треуго́льники** оҡшаш өсмөйөштәр ♦ **ничего́ подо́бного** һис тә улай түгел; **и тому́ подо́бное (и т.п.)** һәм башҡа шундайҙар (һ.б.ш.)

**ПОДОБОСТРА́СТИЕ** *с* и **ПОДОБОСТРА́СТНОСТЬ** *ж* ялағайлыҡ, ярамһаҡлыҡ, эпкәләйлек

**ПОДОБОСТРА́СТНЫЙ,** -ая, -ое ялағай, ярамһаҡ, эпкәләй; **подобостра́стный взгляд** ярамһаҡ ҡараш

**ПОДОБРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*поднять, собрать*) йыйып алыу, алып ҡуйыу; **подобра́ть до́ску** таҡтаны алып ҡуйыу **2.** *кого*; *разг.* (*взять на своё попечение*) үҙеңә алыу, үҙең менән алыу; **подобра́ть щенка́** көсөктө үҙеңә алыу **3.** *что* төҙәтеп (рәтләп, ҡыҫтырып) ҡуйыу, йыйыу; **подобра́ть во́лосы** сәсте рәтләп ҡуйыу **4.** *что* (*приподнять вверх*) күтәреү, күтәреп ҡыҫтырып ҡуйыу; **подобра́ть по́лы пальто́** пальтоның итәген күтәреү **5.** *кого-что* һайлап алыу, һайлау, табыу, яратыу; **подобра́ть хоро́ших помо́щников** яҡшы ярҙамсылар һайлап алыу; **подобра́ть ключ к замку́** йоҙаҡҡа асҡыс яратыу

**ПОДОБРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йыйылыу, тупланыу; **подобрала́сь хоро́шая библиоте́ка** яҡшы китапхана тупланды **2.** (*подкрасться*) һиҙҙермәй килеү **3.** (*принять подтянутый вид*) турайыу, төҙәтенеү **4.** (*сжаться*) ҡымтыныу, йыйыныу **5.** *к кому*; *перен.*, *разг.* (*войти в доверие*) ярамһаҡланып (ярап) алыу

**ПОДОБРЕ́ТЬ** *сов.* яҡшыланып (киң күңелләнеп) китеү, яҡшылана (күңеле йомшара) төшөү

**ПОДОБРУ́** *нареч.*; *прост.* яҡшылыҡ менән, яҡшылап ♦ **подобру́-поздоро́ву (убира́йся, уходи́ и т.п.)** яҡшы сағында, бер-бер хәл булмаҫ борон (кит, һыпырт һ.б.)

**ПОДО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** мейес төбө …ы; **подо́вый кирпи́ч** мейес төбө кирбесе **2.** мейес төбөндә бешкән; **подо́вый хлеб** мейес төбөндә бешкән икмәк

**ПОДОГНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡыуып килтереү, килтереп ҡуйыу; **подогна́ть скот к воро́там** малды ҡапҡаға ҡыуып килтереү **2.** *кого-что* (*загнать*) (аҫтына) индереп ҡуйыу, ҡыуып индереү; **подогна́ть ло́дку под мост** кәмәне күпер аҫтына индереп ҡуйыу; **подогна́ть цыпля́т под наве́с** себештәрҙе лапаҫ аҫтына ҡыуып индереү **3.** *кого-что* и *без доп.* ҡыуалау, ашыҡтырыу; **подогна́ть лошаде́й** аттарҙы ҡыуалау; **подогна́ть отстаю́щих** артта ҡалыусыларҙы ашыҡтырыу **4.** *что* (*приладить*) яйлау, ипләү, яратыу, яйлап (яратып) ҡуйыу; **подогна́ть ра́мы к окна́м** ҡыҫандарҙы тәҙрә уйымына яратып ҡуйыу **5.** *что*; *разг.* (*приурочить*) тура (тап) килтереү; **подогна́ть сва́дьбу к пра́зднику** туйҙы байрамға тура килтереү

**ПОДОГНУ́ТЬ** *сов.* *что*; *в разн. знач.* бөгөү, ҡайтарыу; (*о ногах*) бөкләү, бөкләп ҡуйыу; **подогну́ть рука́в** еңде ҡайтарыу; **подогну́ть край листа́ желе́за** ҡалайҙың ситен бөгөү; **подогну́ть но́ги под себя́** аяҡ бөкләп ултырыу

**ПОДОГНУ́ТЬСЯ** *сов.*; *в разн. знач.* бөгөлөү, бөкләнеү, эйелеү; **поля́ шля́пы подогну́лись** эшләпәнең ситтәре бөкләнгән; **листы́ кни́ги подогну́лись** китаптың биттәре бөкләнгән; **коле́ни подогну́лись** тубыҡтар бөгөлгән

**ПОДОГРЕ́В** *м см.* **подогре́ть** — **подогрева́ть, подогре́ться** — **подогрева́ться**; **бассе́йн с подогре́вом** йылытылмалы бассейн

**ПОДОГРЕВА́НИЕ** *с см.* **подогрева́ть** — **подогрева́ться**

**ПОДОГРЕВА́ТЕЛЬ** *м* йылытҡыс

**ПОДОГРЕВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йылытыу …ы; **подогрева́тельный аппара́т** йылытыу аппараты

**ПОДОГРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **подогре́ть**

**ПОДОГРЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подогре́ться** **2.** *страд. от* **подогрева́ть**

**ПОДОГРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* йылытыу, йылыта биреү (төшөү); **подогре́ть во́ду** һыу йылытыу **2.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* ҡыҙҙырыу, ярһытыу; **подогре́ть стра́сти** дәртте ҡыҙҙырыу

**ПОДОГРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йылыныу; **ча́йник уже́ подогре́лся** сәйнүк йылынған инде **2.** ярһыу, ҡыҙыу

**ПОДОДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **пододви́нуть**

**ПОДОДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пододви́нуться** **2.** *страд. от* **пододвига́ть**

**ПОДОДВИ́НУТЬ** *сов. кого-что* яҡыныраҡ килтереү (шылдырыу), яҡынайта төшөү; **пододви́нуть стул к столу́** ултырғысты өҫтәлгә яҡыныраҡ шылдырыу (яҡынайтыу)

**ПОДОДВИ́НУТЬСЯ** *сов.* яҡыныраҡ килеү (шылыу), яҡыная төшөү

**ПОДОДЕЯ́ЛЬНИК** *м* одеял (юрған) тышы

**ПОДОЖДА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, чего* и *без доп.* көтөп тороу; **подожда́ть дру́га** дуҫты көтөп тороу; **подожда́ть по́езд** поезд көтөп тороу; **2.** *с чем* и *с неопр.* (*повременить*) тороп (туҡтап) тороу, сабыр итеү, кисектереп тороу; **подожда́ть с отве́том** яуап биреүҙе кисектереп тороу

**ПОДОЗВА́ТЬ** *сов. кого-что* саҡырып алыу (килтереү)

**ПОДОЗРЕВА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** шикләнеү, шөбһәләнеү, шик (шөбһә) тотоу; **подозрева́ть собесе́дника в нейскренности** әңгәмәләшеңдең ихласлығына шикләнеү **2.** *о чём* тип уйлау (белеү, күреү); **я подозрева́ю, что он заболе́л** мин уны ауырып киткәндер тип уйлайым

**ПОДОЗРЕВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **подозрева́ть** 1

**ПОДОЗРЕ́НИЕ** *с* шик, шөбһә; **необосно́ванное подозре́ние** нигеҙһеҙ шик; **быть под подозре́нием** шик аҫтында булыу

**ПОДОЗРИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* шиклелек, шикләнеүсәнлек; **изли́шняя подозри́тельность** артыҡ шикләнеүсәнлек

**ПОДОЗРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*внушающий подозрение*) шикле, шөбһәле, шик тыуҙырған; **подозри́тельный челове́к** шикле кеше **2.** (*недоверчивый*) шиксел, шөбһәләнеүсән, шикләнеп ҡараусан; **подозри́тельный хара́ктер** шиксел холоҡ; **стать о́чень подозри́тельным** үтә шикләнеүсән булып китеү

**ПОДОИ́ТЬ** *сов. см.* **дои́ть**

**ПОДО́ЙНИК** *м* һөт күнәге (силәге)

**ПОДОЙТИ́** *сов.* **1.** яҡын килеү, килеп етеү (туҡтау); **подойти́ к до́му** өйгә яҡын килеү; **подошёл по́езд** поезд килеп туҡтаны **2.** (*приступить к чему-л.*) тотоноу, керешеү, барып (килеп) етеү, -а/-ә башлау, килеү; **подойти́ к изуче́нию дробе́й** кәсерҙәрҙе өйрәнә башлау; **подойти́ к вы́водам** һығымталарға килеү; **подойти́ к и́стине** хәҡиҡәткә барып етеү **3.** (*отнестись к кому-чему-л. каким-л. образом*) мөнәсәбәттә булыу, -дан/-дән сығып ҡарау; **подойти́ объекти́вно к оце́нке рабо́ты** эште баһалауға объектив күҙлектән сығып ҡарау **4.** (*оказаться близко к чему-л.*) барып (килеп) тоташыу (терәлеү), терәлеп тороу; **лес подошёл к са́мой доро́ге** урман юлға уҡ килеп терәлә **5.** (*о времени, явлении, событии и т.п.*) яҡынлау, булыу; **подойти́ к тридца́ти года́м** утыҙ йәштәргә яҡынлау; **подошёл и ве́чер** кис тә булды **6.** (*быть годным для кого-чего-л.*) ярау, яраҡлы булыу, тура килеү; **э́то пальто́ мне подойдёт** был пальто миңә ярар **7.** *разг.* (*подняться — о тесте*) ҡабарыу, күтәрелеү; **те́сто подошло́** ҡамыр ҡабарған ♦ **подойти́ к концу́** бөтөп килеү (ҡуйыу)

**ПОДОКО́ННИК** *м* тәҙрә тупһаһы (төбө)

**ПОДО́Л** *м* итәк; **подо́л пальто́** пальто итәге

**ПОДО́ЛГУ** *нареч.* оҙаҡ, оҙаҡ ваҡыт; **подо́лгу игра́ть на у́лице** урамда оҙаҡ уйнау

**ПОДОЛЬСТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ялағайланып ярау, йыумалау

**ПОДО́НОК** *м* **1.** *только мн.* **подо́нки** (*остатки жидкости на дне вместе с осадком*) һарҡынды, (төптәге) ҡалдыҡ(тар) **2.** *разг.* (*подлец*) әҙәм аҡтығы, этрәгәләм

**ПОДОПЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** опекалағы, ҡарауҙағы; **подопе́чное лицо́** опекалағы кеше **2.** *в знач. сущ.* **подопе́чный** *м* и **подопе́чная** *ж* опекалағы кеше

**ПОДОПЛЁКА** *ж* **1.** *уст.* күлдәк эслеге **2.** (*действительная, но скрытая причина*) сер, йәшерен сәбәп

**ПОДОПРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **подопре́ть**

**ПОДОПРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* бурһый (ҡыҙа, яна) башлаған; **подопре́лое се́но** ҡыҙа башлаған бесән

**ПОДОПРЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* бурһый (ҡыҙа, яна) башлау; (*о человеке*) бышлығыу; **соло́ма подопре́ла** һалам яна башлаған; **ребёнок подопре́л** бала бышлыҡҡан

**ПОДО́ПЫТНЫЙ,** -ая, -ое тәжрибәгә тотолған, тәжрибә яһалған (алып барылған); **подо́пытные живо́тные** тәжрибәгә тотолған хайуандар

**ПОДОРВА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* шартлатыу; **подорва́ть мост** күперҙе шартлатыу **2.** *что*; *перен.* ҡаҡшатыу, зыян килтереү, төшөрөү; **подорва́ть здоро́вье** сәләмәтлекте ҡаҡшатыу; **подорва́ть авторите́т** абруйҙы төшөрөү

**ПОДОРВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** шартлау; **подорва́ться на ми́не** минала шартлау **2.** *перен.* ҡаҡшау, зыян килеү, төшөү; **его́ авторите́т подорва́лся** уның абруйы төштө; **здоро́вье его́ подорвало́сь** сәләмәтлеге ҡаҡшаны

**ПОДОРОЖА́ТЬ** *сов. см.* **дорожа́ть**

**ПОДОРО́ЖНАЯ** *ж*; *ист.* юл таныҡлығы (*элек юлаусыларға почта атын файҙаланыу хоҡуғы биргән махсус таныҡлыҡ*)

**ПОДОРО́ЖНИК** *м* юл япрағы

**ПОДОСА́ДОВАТЬ** *сов.*; *разг.* көйөнөп (үкенеп) алыу

**ПОДОСИ́НОВИК** *м* уҫаҡ бәшмәге

**ПОДОСЛА́ТЬ** *сов. кого-что* йәшерен (аҫтыртын) эш менән ебәреү

**ПОДОСНО́ВА** *ж* **1.** *текст.* аҫҡы буйлыҡ (*ике буйлығы булған туҡымала*) **2.** *перен.* (*истинная причина*) төп нигеҙ, төп сәбәп

**ПОДОСПЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* килеп етеү (өлгөрөү), етешеү; **по́мощь подоспе́ла во́время** ярҙам ваҡытында килеп өлгөрҙө; **подоспе́ла пора́ обе́да** төшкө аш ваҡыты килеп етте

**ПОДОСТЛА́ТЬ** *сов. что* аҫҡа йәйеү (түшәү); **подостла́ть простыню́** аҫҡа йәймә (япма) йәйеү

**ПОДОТКНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡыҫтырыу, ҡымтыу; **подоткну́ть одея́ло** одеялды ҡымтыу **2.** (*заткнуть под пояс полы одежды*) ҡыҫтырып ҡуйыу; **подоткну́ть фа́ртук** алъяпҡысты ҡыҫтырып ҡуйыу

**ПОДОТЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һуңынан иҫәпләшеү шарты менән бирелгән; **подотчётные де́ньги** һуңынан иҫәпләшеү шарты менән бирелгән аҡса **2.** отчёт (иҫәп-хисап һ.б.) бирергә тейешле; **подотчётные организа́ции** иҫәп-хисап бирергә тейешле ойошмалар

**ПОДО́ХНУТЬ** *сов.* **1.** (*околеть*) үлеү, ҡырылыу, үлеп (ҡырылып) бөтөү **2.** *груб.*, *прост.* (*умереть — о человеке*) дөмөгөү

**ПОДОХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое килем ...ы, төшөм ...ы, табыш ...ы; **подохо́дный нало́г** килем һалымы

**ПОДО́ШВА** *ж* **1.** *разг.* (*ступня*) аяҡ табаны **2.** (*нижняя часть обуви*) табан, олтан; **ко́жаная подо́шва** күн табан **3.** (*основание чего-л.*) итәк; **подо́шва горы́** тау итәге

**ПОДО́ШВЕННЫЙ,** -ая, -ое олтанлыҡ, табанлыҡ; **подо́швенная ко́жа** олтанлыҡ күн

**ПОДПАДА́ТЬ** *несов. см.* **подпа́сть**

**ПОДПА́ИВАТЬ I** *несов. см.* **подпая́ть**

**ПОДПА́ИВАТЬ II** *несов. см.* **подпои́ть**

**ПОДПА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **подпали́ть**

**ПОДПА́ЛИНА** *ж* **1.** *разг.* өтөлгән (көйгән) урын **2.** (*пятно на шерсти или мехе*) тимгел, тап; **конь вороно́й с подпа́линами** тимгелле ҡара ат

**ПОДПАЛИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** *см.* **подже́чь** **2.** бер аҙ өтөп (көйҙөрөп) алыу

**ПОДПА́РЫВАТЬ** *несов. см.* **подпоро́ть**

**ПОДПА́РЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подпоро́ться 2.** *страд. от* **подпа́рывать**

**ПОДПА́СОК** *м* көтөүсе ярҙамсыһы (малай)

**ПОДПА́СТЬ** *сов. подо что* -ға/-гә бирелеү (төшөү); **подпа́сть под влия́ние** *чьё-л. берәйһенең* йоғонтоһона бирелеү

**ПОДПАЯ́ТЬ** *сов. что* аҫтан йәбештереү

**ПОДПЕВА́ЛА** *м* и *ж* **1.** ҡушылып йырлаусы **2.** *перен., разг., презр.* (берәүҙең) йырын йырлаусы

**ПОДПЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** ҡушылып йырлау **2.** *перен., разг., презр.* (берәүҙең) йырын йырлау, (берәүҙең) көйөн көйләү

**ПОДПЕРЕ́ТЬ** *сов. что* терәтеп ҡуйыу, терәү һалыу, таяныу, терәү; **подпере́ть забо́р ко́льями** ҡойманы ҡаҙыҡтар менән терәтеп ҡуйыу; **подпере́ть щёку** яңаҡҡа таяныу

**ПОДПЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.; разг.* таяныу, терәлеү

**ПОДПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **подпили́ть**

**ПОДПИЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (төптән) бысыу; **подпили́ть де́рево** ағасты төбөнән бысыу **2.** (*укоротить*) бысып ҡыҫҡартыу; **подпили́ть но́жки сту́ла** ултырғыстың аяҡтарын бысып ҡыҫҡартыу **3.** *разг.* (*подровнять пилкой, напильником*) игәү, игәп тигеҙләү; **подпили́ть но́гти** тырнаҡтарҙы игәп тигеҙләү

**ПОДПИ́ЛОК** *м; разг. см.* **напи́льник**

**ПОДПИРА́ТЬ** *несов. см.* **подпере́ть**

**ПОДПИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подпере́ться 2.** *страд. от* **подпира́ть**

**ПОДПИСА́НИЕ** *с см.* **подписа́ть** 1; **подписа́ние догово́ра** килешеүгә ҡул ҡуйыу

**ПОДПИСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡул ҡуйыу; **подписа́ть прика́з** бойороҡҡа ҡул ҡуйыу **2.** *что* (өҫтәп) яҙып ҡуйыу; **подписа́ть не́сколько стро́чек** бер нисә юл өҫтәп яҙып ҡуйыу **3.** *кого* (*включить в число подписчиков*) яҙҙырыу; **подписа́ть на журна́л** журналға яҙҙырыу

**ПОДПИСА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡул ҡуйыу; **подписа́ться под дове́ренностью** ышаныс яҙыуына ҡул ҡуйыу **2.** *на что* яҙылыу; **подписа́ться на газе́ту** гәзиткә яҙылыу

**ПОДПИ́СКА** *ж* **1.** *см.* **подписа́ть** 3 — **подпи́сывать** 3, **подписа́ться** 2 — **подпи́сываться**; **подпи́ска на газе́ты** гәзиттәргә яҙылыу; **произвести́ подпи́ску** яҙылыу үткәреү **2.** (*письменное обязательство в чём-л.*) яҙма йөкләмә; **подпи́ска о невы́езде** (йәшәгән ерҙән) китмәҫкә яҙма йөкләмә биреү

**ПОДПИСНО́Й,** -ая, -ое **1.** яҙылыу ...ы; **подписна́я цена́** яҙылыу хаҡы **2.** яҙылып алдыра торған; **подписно́е изда́ние** яҙылып алдыра торған баҫма ♦ **подписно́й лист** ҡул ҡуйыу ҡағыҙы (*берәйһенә ярҙам йыйыу өсөн аҡса биреүселәр ҡул ҡуя торған ҡағыҙ*)

**ПОДПИ́СЧИК** *м* и **ПОДПИ́СЧИЦА** *ж* яҙылыусы, яҙылып алдырыусы; **постоя́нные подпи́счики журна́ла** журналға даими яҙылыусылар

**ПОДПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **подписа́ть**

**ПОДПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подписа́ться 2.** *страд. от* **подпи́сывать**

**ПО́ДПИСЬ** *ж* **1.** *см.* **подписа́ть** — **подпи́сывать** 1, 2; **отда́ть бума́ги на по́дпись** ҡағыҙҙарҙы ҡул ҡуйырға биреү **2.** ҡултамға; **поста́вить по́дпись** ҡултамға ҡуйыу **3.** (*надпись под чем-л., на чём-л.*) яҙылған һүҙ, яҙыу; **по́дпись под карти́ной** картина аҫтындағы яҙыу

**ПОДПИ́ТИЕ: в подпи́тии** *разг.* ҡыҙмаса хәлдә

**ПОДПИ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **подпихну́ть**

**ПОДПИХНУ́ТЬ** *сов. кого-что; разг.* **1.** этеп (төртөп) ебәреү; **подпихну́ть ло́дку** кәмәне этеп ебәреү **2.** этеп (тығып) ҡуйыу; **подпихну́ть я́щик под стол** йәшникте өҫтәл аҫтына этеп ҡуйыу

**ПОДПЛЫВА́ТЬ** *несов. см.* **подплы́ть**

**ПОДПЛЫ́ТЬ** *сов.* **1.** йөҙөп килеү (килеп етеү); **подплы́ть к бе́регу** ярға йөҙөп килеү **2.** (аҫтына) йөҙөп инеү; **подплы́ть под мост** күпер аҫтына йөҙөп инеү

**ПОДПОИ́ТЬ** *сов. кого-что; разг.* эсереп иҫертеү

**ПОДПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **подползти́**

**ПОДПОЛЗТИ́** *сов.* **1.** шыуышып (үрмәләп) килеү; **подползти́ к око́пу** окоп янына шыуышып килеү **2.** (аҫтына) шыуышып (үрмәләп) инеү; **подползти́ под стол** өҫтәл аҫтына шыуышып инеү

**ПОДПОЛКО́ВНИК** *м* подполковник

**ПОДПО́ЛЬЕ** *с* **1.** иҙән аҫты, өй баҙы; **храни́ть о́вощи в подпо́лье** йәшелсәләрҙе өй баҙында һаҡлау **2.** подполье; **уйти́ в подпо́лье** подпольеға күсеү; **рабо́тать в подпо́лье** подпольела эшләү

**ПОДПО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое подпольелағы, йәшерен; **подпо́льный кружо́к** йәшерен түңәрәк; **подпо́льная типогра́фия** йәшерен типография

**ПОДПО́ЛЬЩИК** *м; ист.* подпольщик (*подпольела эшләүсе*)

**ПОДПО́РА** и **ПОДПО́РКА** *ж* **1.** терәк, таяу, терәү **2.** *разг., уст., перен.* (*поддержка, опора*) терәк

**ПОДПО́РНЫЙ,** -ая, -ое терәк ...ы, таяу ...ы, терәү ...ы; **подпо́рная доска́** терәү таҡтаһы; **подпо́рный брус** таяу бурсаһы

**ПОДПОРО́ТЬ** *сов. что* (эстән) һүтә биреү, (эстән) һүтеп сығыу; **подпоро́ть подкла́дку** эслекте һүтеп сығыу

**ПОДПОРО́ТЬСЯ** *сов.* (эстән) һүтелә биреү (төшөү), (эстән) бер аҙ һүтелеү; **подкла́дка подпоро́лась** эслек һүтелә биргән; **рука́в подпоро́лся** ең эстән бер аҙ һүтелгән

**ПОДПО́РТИТЬ** *сов. что; разг.* әҙерәк (бер аҙ) боҙоу (насарайтыу), боҙа (насарайта) биреү (төшөү)

**ПОДПО́РТИТЬСЯ** *сов.; разг.* әҙерәк (бер аҙ) боҙолоу (насарайыу), боҙола (насарая) биреү (төшөү); **зре́ние подпо́ртилось** күҙ күреүе насарая төштө

**ПОДПОРУ́ЧИК** *м* подпоручик

**ПОДПО́ЧВА** *ж*; *геол.* тупраҡ аҫты (*өҫкө ҡатлау аҫтындағы ер*)

**ПОДПО́ЧВЕННЫЙ,** -ая, -ое тупраҡ аҫты ...ы; **подпо́чвенные во́ды** тупраҡ аҫты һыуҙары; **подпо́чвенный слой** тупраҡ аҫты ҡатлауы

**ПОДПОЯ́САТЬ** *сов. кого-что* билгә (билде) быуыу (бәйләү); **подпоя́сать реме́нь** билгә ҡайыш быуыу

**ПОДПОЯ́САТЬСЯ** *сов.* билгә (бил) быуыу (бәйләү); **подпоя́саться кушако́м** билгә ҡушаҡ бәйләү

**ПОДПОЯ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **подпоя́сать**

**ПОДПОЯ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подпоя́саться 2.** *страд. от* **подпоя́сывать**

**ПОДПРА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *что* төҙәткеләү, төҙәтештереү; **подпра́вить рису́нок** рәсемде төҙәтештереү **2.** *кого-что*; *разг.* бер аҙ төҙәтеү (дауалау); **подпра́вить здоро́вье** һаулыкты бер аҙ дауалау

**ПОДПРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **подпра́вить**

**ПОДПРА́ПОРЩИК** *м* подпрапорщик

**ПОДПРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **подопре́ть**

**ПОДПРУ́ГА** *ж* айыл; **подтяну́ть подпру́гу** айылды тарттырыу

**ПОДПРЫ́ГИВАНИЕ** *с см.* **подпры́гивать**

**ПОДПРЫ́ГИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **подпры́гнуть 2.** (*подскакивать*) ырғанлау, һикерәнләү, һикергеләү

**ПОДПРЫ́ГНУТЬ** *сов.* һикереү, ырғыу, һикереп (ырғып) китеү; **подпры́гнуть высоко́** үргә һикереү; **подпры́гнуть от ра́дости** ҡыуаныстан ырғып китеү

**ПОДПРЯГА́ТЬ** *несов. см.* **подпря́чь**

**ПОДПРЯГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подпря́чься 2.** *страд. от* **подпряга́ть**

**ПОДПРЯ́ЧЬ** *сов. кого-что* ҡушып (мисәп) егеү

**ПОДПРЯ́ЧЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡушылып (мисәүләп) егелеү; **подпря́чься в теле́гу** арбаға ҡушылып егелеү

**ПОДПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **подпусти́ть**

**ПОДПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* яҡын ебәреү (килтереү); **охо́тник подпусти́л медве́дя побли́же** һунарсы айыуҙы яҡынырaҡ ебәрҙе **2.** *кого* (*запустить*) ҡушыу; **подпусти́ть телёнка к коро́ве** быҙауҙы һыйырға ҡушыу **3.** *что*; *разг.* әйтеп ташлау, (уңайын тура килтереп) әйтеү; **подпусти́ть шу́тку** уңайын тура килтереп мәҙәк әйтеү

**ПОДРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **подрабо́тать**

**ПОДРАБО́ТАТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** эшләп еткереү, ҡайтанан ҡарап (сығыу); **подрабо́тать резолю́цию** резолюцияны ҡайтанан ҡарап сығыу **2.** *чего* и *без доп.* өҫтәмә (өҫтәп) эшләп алыу; **подрабо́тать де́нег** өҫтәмә аҡса эшләп алыу

**ПОДРАБО́ТКА** *ж*; *разг. см.* **подрабо́тать** — **подраба́тывать**

**ПОДРА́ВНИВАТЬ** *несов. см.* **подровня́ть**

**ПОДРА́ГИВАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** ҡалтырау, дерелдәү, ҡалтырап (дерелдәп) ҡуйыу; **ру́ки подра́гивают** ҡулдар ҡалтырап ҡуя **2.** *чем* ҡалтыратыу, дерелдәтеү; **конь подра́гивал ко́жей** ат тиреһен дерелдәтеп ҡуя ине

**ПОДРАЖА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **подража́ть**; **подража́ние взро́слым** ололар булып ҡыланыу; **подража́ние го́лосу птиц** ҡоштар тауышына оҡшатырға тырышыу **2.** (*произведение, подражающее какому-л. образцу*) оҡшатып (эйәреп) эшләнгән нәмә; **жа́лкое подража́ние** түбән кимәлдәге эйәреп эшләнгән нәмә

**ПОДРАЖА́ТЕЛЬ** *м* эйәреүсе, оҡшатыусы

**ПОДРАЖА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** эйәреү ...ы, оҡшатыу ...ы; **подража́тельные слова́** оҡшатыу һүҙҙәре; **подража́тельные спосо́бности** оҡшатыу һәләте **2.** (*являющийся подражанием*) оҡшатып (эйәреп) эшләнгән; **подража́тельная карти́на** эйәреп эшләнгән рәсем

**ПОДРАЖА́ТЬ** *несов. кому-чему* оҡшатыу, оҡшатып (булып) эшләү, ҡыланыу, эйәреү; **подража́ть пе́нию птиц** ҡош булып һайрау

**ПОДРАЗДЕ́Л** *м* бүлексә, өлөш; **подразде́л главы́** бүлектең өлөшө

**ПОДРАЗДЕЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **подраздели́ть** — **подразделя́ть 2.** бүлексә, бүлек, өлөш; **произво́дственные подразделе́ния** етештереү бүлектәре **3.** *воен.* подразделение

**ПОДРАЗДЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* бүлгеләү, бүлеү; **подраздели́ть главу́ на пара́графы** бүлекте параграфтарға бүлгеләү

**ПОДРАЗДЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **подраздели́ть**

**ПОДРАЗДЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бүленеү, бүлгеләнеү; **батальо́н подразделя́ется на ро́ты** батальон роталарға бүленә **2.** *страд. от* **подразделя́ть**

**ПОДРА́ЗНИВАТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* үсектергеләү, ирештергеләү

**ПОДРАЗНИ́ТЬ** *сов. кого-что* үсектереп (ирештереп) алыу

**ПОДРАЗУМЕВА́ТЬ** *несов. кого-что* күҙ алдында (уңында) тотоу, күҙҙә тотоу, уйлау; **что вы подразумева́ете под э́тими слова́ми?** был һүҙҙәрҙә һеҙ нимәне күҙ уңында тотаһығыҙ?

**ПОДРАЗУМЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** күҙ алдында тотолоу, аңлашылыу, фараз ителеү, хисапланылыу; **э́то само́ собо́ю подразумева́ется** был үҙенән-үҙе аңлашыла **2.** *страд. от* **подразумева́ть**

**ПОДРА́МНИК** и **ПОДРА́МОК** *м* кирге (*һүрәт төшөргәндә киндер туҡыманы киреп ҡуйыу өсөн яһалған ағас ҡыҫан*)

**ПОДРА́НИТЬ** *сов. кого-что*; *охот.* еңелсә яралау; **подра́нить за́йца** ҡуянды еңелсә яралау

**ПОДРА́НОК** *м*; *охот.* яраланған йәнлек (ҡош) (*аусы тарафынан*)

**ПОДРАСТА́НИЕ** *с см.* **подраста́ть**

**ПОДРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **подрасти́**

**ПОДРАСТА́ЮЩИЙ,** -ая, -ое үҫеп килеүсе, йәш; **подраста́ющее поколе́ние** үҫеп килеүсе быуын

**ПОДРАСТИ́** *сов.* үҫә төшөү (биреү), үҫеп китеү; **де́ти подросли́** балалар үҫә төшкән; **трава́ подросла́** үлән үҫеп киткән

**ПОДРАСТИ́ТЬ** *сов. кого-что* үҫтереү, үҫтерә биреү (төшөү); **подрасти́ть теля́т** быҙауҙарҙы үҫтерә биреү; **подрасти́ть дере́вья** ағастар үҫтереү

**ПОДРА́ТЬСЯ** *сов. см.* **дра́ться** 1

**ПОДРА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **подрасти́ть**

**ПОДРЁБЕРНЫЙ,** -ая, -ое ҡабырға аҫтындағы; **подрёберные мы́шцы** ҡабырға аҫтындағы мускулдар

**ПОДРЕБЕ́РЬЕ** *с*; *анат.* ҡабырға аҫты; **ле́вое подребе́рье** һул ҡабырға аҫты

**ПОДРЕ́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* (*укоротить*) ҡырҡып (киҫеп) ҡыҫҡартыу; **подре́зать во́лосы** сәсте ҡырҡып ҡыҫҡартыу **2.** *что* аҫтан (төптән) ҡырҡып алыу; **подре́зать сте́бель** һабаҡты төптән ҡырҡып алыу **3.** *что, чего* (*нарезать дополнительно*) өҫтәп ҡырҡыу (киҫеү); **подре́зать хле́ба** өҫтәп икмәк ҡырҡыу ♦ **подре́зать кры́лья** *см.* **крыло́**

**ПОДРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **подре́зать**

**ПОДРЕ́ЗКА** *ж см.* **подре́зать** — **подреза́ть**

**ПОДРЕМА́ТЬ** *сов.* серем итеп алыу

**ПОДРИСОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** төҙәтә (асыҡландыра) төшөү, баҙыҡландырыу (*рәсемде, фотоны*); **подрисова́ть портре́т** портретты асыҡландыра төшөү **2.** (*дополнить рисунок*) өҫтәп яһау (төшөрөү); **подрисова́ть усы́** өҫтәп мыйыҡ яһау **3.** *разг.* (*сделать рисунок более отчётливым*) буяп асыҡландыра төшөү

**ПОДРИСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **подрисова́ть**

**ПОДРО́БНОСТЬ** *ж* **1.** тулылыҡ, тәфсир, ентеклек; **подро́бность описа́ния** тасуирлауҙың тулылығы **2.** (*деталь, частность*) ваҡлыҡ; **не вдава́ться в подро́бности** бөтә ваҡлыҡтарына туҡталып тормау

**ПОДРО́БНЫЙ,** -ая, -ое ентекле, тулы, тәфсирле; **подро́бные све́дения** тулы мәғлүмәттәр; **подро́бное описа́ние** тәфсирле тасуир

**ПОДРОВНЯ́ТЬ** *сов. что* тигеҙләү, тигеҙләй төшөү; **подровня́ть во́лосы** сәсте тигеҙләү; **подровня́ть края́ мате́рии** туҡыманың ситтәрен тигеҙләй төшөү

**ПОДРОВНЯ́ТЬСЯ** *сов.* тигеҙләнеү, тиңләшеү; **подровня́ться по правофланго́вым** уң флангыларға тиңләшеү

**ПОДРОСТКО́ВЫЙ,** -ая, -ое үҫмер(ҙәр) ...ы; **подростко́вая о́бувь** үҫмерҙәр аяҡ кейеме

**ПОДРО́СТОК** *м* үҫмер, йәш үҫмер

**ПОДРУБА́ТЬ I** *несов. см.* **подруби́ть** I

**ПОДРУБА́ТЬ II** *несов. см.* **подруби́ть** II

**ПОДРУБИ́ТЬ I** *сов. что* **1.** төптән ҡырҡыу (киҫеү); **подруби́ть дуб** имәнде төптән ҡырҡыу **2.** (*укоротить*) киҫеп (ҡырҡып) ҡыҫҡартыу; **подруби́ть но́жки стола́** өҫтәлдең аяҡтарын ҡырҡып ҡыҫҡартыу **3.** *чего*; *разг.* өҫтәп (бер аҙ) ҡырҡыу (киҫеү, турау); **подруби́ть дров** бер аҙ утын ҡырҡыу; **подруби́ть капу́сты** бер аҙ кәбеҫтә турау **4.** *горн.* сабыу; **подруби́ть пласт угля́** бер ҡатлам күмер сабыу

**ПОДРУБИ́ТЬ II** *сов. что* ситен бөгөү (бөгөп тегеү); **подруби́ть носово́й плато́к** ҡулъяулыҡтың ситен бөгөү

**ПОДРУ́БКА I** *ж см.* **подруби́ть** I — **подруба́ть** I

**ПОДРУ́БКА II** *ж см.* **подруби́ть** II — **подруба́ть** II

**ПОДРУ́ГА** *ж* дуҫ ҡатын-ҡыҙ, әхирәт ♦ **подру́га жи́зни** тормош юлдашы (*ҡатынға ҡарата*)

**ПОДРУЖИ́ТЬСЯ** *сов. с кем* и *без доп.* дуҫлашыу, дуҫлашып китеү

**ПОДРУ́ЖКА** *ж*; *разг., ласк. от* **подру́га**

**ПОДРУ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **подрули́ть**

**ПОДРУЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*подъехать куда-л., управляя судном, машиной*) (рулен бороп) алып килеү (яҡын килтереү) **2.** *ав.* (*подкатить — о самолёте*) килеү, яҡын килеү

**ПОДРУМЯ́НИВАТЬ** *несов. см.* **подрумя́нить**

**ПОДРУМЯ́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подрумя́ниться** **2.** *страд. от* **подрумя́нивать**

**ПОДРУМЯ́НИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* бер аҙ ҡыҙартыу (алһыуландырыу); **моро́з подрумя́нил ему́ щёки** һыуыҡ уның биттәрен бер аҙ алһыуландырған **2.** *кого-что* (*подкрасить*) алһыулатыу, бер аҙ ҡыҙыл (һандал) яғыу (һөртөү); **подрумя́нить щёки** сикәләрҙе алһыулатыу **3.** *что* (*поджарить*) ҡыҙартып бешереү (ҡурыу)

**ПОДРУМЯ́НИТЬСЯ** *сов.* **1.** әҙерәк ҡыҙарыу, алһыуланыу; **щёки подрумя́нились на моро́зе** һыуыҡта биттәр алһыуланған **2.** (*подкраситься*) әҙерәк ҡыҙыл (һандал) яғыу (һөртөнөү) **3.** (*поджариться*) ҡыҙарып бешеү (ҡурылыу)

**ПОДРУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡул осондағы (аҫтындағы); **подру́чный инструме́нт** ҡул осондағы ҡорамал **2.** *в знач. сущ.* **подру́чный** *м* ярҙамсы; **подру́чный сле́саря** слесарь ярҙамсыһы

**ПОДРЫ́В** *м см.* **подорва́ть** — **подрыва́ть** I, **подорва́ться** — **подрыва́ться** I; **подры́в го́рной поро́ды** тау тоҡомон шартлатыу; **подры́в авторите́та** абруйын төшөрөү

**ПОДРЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **подорва́ть**

**ПОДРЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **подры́ть**

**ПОДРЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **подорва́ться** **2.** *страд. от* **подрыва́ть** I

**ПОДРЫВА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **подры́ться** **2.** *страд. от* **подрыва́ть** II

**ПОДРЫВНО́Й,** -ая, -ое **1.** шартлатыу ...ы; **подрывны́е рабо́ты** шартлатыу эштәре **2.** (*предназначенный для подрыва*) шартлатҡыс, шартлата торған; **подрывно́й патро́н** шартлатҡыс патрон **3.** *перен.* (*вредительский*) емереү ...ы, ҡоротҡослоҡ ...ы; **подрывна́я де́ятельность** емереү эше

**ПОДРЫ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*подкопать*) төптән (төбөн, аҫтын) ҡаҙыу; **подры́ть де́рево** ағас төбөн ҡаҙыу **2.** тәрәнәйтеп ҡаҙыу; **подры́ть кана́ву** канауҙы тәрәнәйтеп ҡаҙыу **3.** *разг.* (*немного разрыть*) әҙерәк (бер аҙ) ҡаҙыу ҡаҙа биреү; **подры́ть зе́млю под де́ревом** ағас төбөндәге ерҙе ҡаҙа биреү **4.** *разг.* (*расстроить, разрушить изнутри*) (эстән) ҡаҡшатыу, зыян итеү; **подры́ть могу́щество** ҡеүәтен ҡаҡшатыу

**ПОДРЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (аҫтан, төптән) ҡаҙып инеү; **крот подры́лся под ка́мень** һуҡыр сысҡан таш аҫтына ҡаҙып ингән **2.** *разг.* ҡул етәр (йәнегеҙҙе алырҙар); **подро́емся и под вас!** һеҙгә лә ҡул етәр!

**ПОДРЫХЛИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* йомшарта биреү, әҙерәк йомшартыу; **подрыхли́ть зе́млю** ерҙе йомшарта биреү

**ПОДРЫХЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **подрыхли́ть**

**ПОДРЯ́Д I** *м* подряд (*билдәле хаҡ менән башҡарыуға алынған йөкләмә һәм шул йөкләмә буйынса ҡтәлгән эш*); **брать подря́д на строи́тельство** төҙөлөштә подрядҡа алыу; **рабо́тать по подря́ду** подряд буйынса эшләү

**ПОДРЯ́Д II** *нареч.* рәттән, бер-бер артлы, бер юлы (ыңғай); **проче́сть подря́д сто страни́ц** рәттән йөҙ бит уҡыу

**ПОДРЯДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* яллау; **подряди́ть гру́зчика** тейәүсе яллау

**ПОДРЯДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ялланыу; **подряди́ться вози́ть дрова́** утын ташырға ялланыу

**ПОДРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое подряд ...ы; **подря́дный спо́соб рабо́ты** эштең подряд ысулы; **подря́дные организа́ции** подряд ойошмалары

**ПОДРЯ́ДЧИК** *м* подрядсы (*ойошма йәки кеше*)

**ПОДРЯЖА́ТЬ** *несов. см.* **подряди́ть**

**ПОДРЯЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подряди́ться** **2.** *страд. от* **подряжа́ть**

**ПОДСАДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* (ярҙам итеп) ултыртыу, мендереү, атландырыу; **подсади́ть на ло́шадь** атҡа атландырыу; **подсади́ть стару́ху в ваго́н** әбейҙе вагонға ултыртыу **2.** *кого*; *разг.* (*посадить дополнительно*) янына (ҡушып, йәнәшә) ултыртыу; **подсади́ть пчёл в у́лей** бал ҡорттарын умартаға ултыртыу **3.** *кого* (*в качестве попутчика*) ултыртып алып барыу **4.** *что, чего* (*растение*) өҫтәп ултыртыу; **подсади́ть молоды́е дере́вья** йәш ағастар өҫтәп ултыртыу **5.** *спец.* (*произвести подсадку*) күсереп ултыртыу; **подсади́ть се́рдце** йөрәкте күсереп ултыртыу

**ПОДСА́ДКА** *ж см.* **подсади́ть — подса́живать**

**ПОДСА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **подсади́ть**

**ПОДСА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подсе́сть** **2.** *страд. от* **подса́живать**

**ПОДСА́ЛИВАТЬ I** *несов. см.* **подса́лить**

**ПОДСА́ЛИВАТЬ II** *несов. см.* **подсоли́ть**

**ПОДСА́ЛИТЬ** *сов. что*; *разг.* туң май ҡушыу, туң май менән майлаңҡырау

**ПОДСА́ХАРИТЬ** *сов. что*; *разг.* шәкәрләү, шәкәр ҡушыу (һибеү); **подса́харить ка́шу** бутҡаны шәкәрләү

**ПОДСВЕТИ́ТЬ** *сов. что* (аҫтан) яҡтыртыу; **подсвети́ть декора́цию** декорацияларҙы аҫтан яҡтыртыу

**ПОДСВЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **подсвети́ть**

**ПОДСВЕ́ЧНИК** *м* шәмдәл; **ме́дный подсве́чник** баҡыр шәмдәл

**ПОДСВИ́НОК** *м* йәш сусҡа (*4—10 айлыҡ*)

**ПОДСВИ́СТЫВАТЬ** *несов.* ҡушылып һыҙғырыу, көй ыңғайына һыҙғырыу; **подсви́стывать пою́щему** йырлаусыға ҡушылып һыҙғырыу

**ПОДСЕ́В** *м* **1.** *см.* **подсе́ять — подсева́ть** **2.** *с.-х.* (*добавочная культура на поле*) өҫтәмә сәсеү

**ПОДСЕВА́ТЬ** *несов. см.* **подсе́ять**

**ПОДСЕВНО́Й,** -ая, -ое өҫтәмә сәселгән, аралаштырып сәселгән; **подсевна́я трава́** өҫтәмә сәселгән үлән

**ПОДСЕДЕ́ЛЬНИК** *м* ыңғырсаҡ бауы

**ПОДСЕДЛА́ТЬ** *сов. кого* эйәрләү; **подседла́ть коня́** ат эйәрләү

**ПОДСЁДЛЫВАТЬ** *несов. см.* **подседла́ть**

**ПОДСЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **подсе́ять**

**ПОДСЕ́КА** *ж*; *с.-х., лес.* ботама (*сәсеүлек өсөн урманда асылған урын*)

**ПОДСЕКА́ТЬ** *несов. см.* **подсе́чь**

**ПОДСЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* янына урынлаштырыу (индереү); **подсели́ть двух челове́к в кварти́ру** фатирға ике кешене индереү

**ПОДСЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **подсели́ть**

**ПОДСЕМЕ́ЙСТВО** *с*; *биол.* ярым ғаилә (*үҫемлектәр һәм хайуандар систематикаһында*)

**ПОДСЕ́СТЬ** *сов.* (янына, яҡынырaҡ) барып (килеп) ултырыу; **подсе́сть к столу́** өҫтәлгә яҡынырaҡ барып ултырыу

**ПОДСЕ́ЧКА** *ж см.* **подсе́чь — подсека́ть**; **подсе́чка ле́са** урман төпләү

**ПОДСЕ́ЧЬ** *сов. что* **1.** төптән ҡырҡып (киҫеп, ҡыйып) ташлау, аҫтан ҡырҡып йығыу; **подсе́чь крапи́ву косо́й** кесерткәнде салғы менән төптән ҡыйып ташлау **2.** *с.-х., лес.* ботау, төпләү; **подсе́чь лес** урман төпләү **3.** *рыб.* кинәт тартыу (*ҡармаҡты*)

**ПОДСЕ́ЯТЬ** *сов. что, чего* **1.** өҫтәп сәсеү; **подсе́ять пшени́цы** бойҙай өҫтәп сәсеү **2.** *с.-х.* аралаштырып (ҡатнаштырып) сәсеү, араһына сәсеү; **по яровО́й пшени́це подсе́ять кле́вер** яҙғы бойҙай араһына туҡранбаш сәсеү

**ПОДСИ́НИВАТЬ** *несов. см.* **подсини́ть**

**ПОДСИНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** зәңгәрләү; **подсини́ть во́ду** һыуҙы зәңгәрләү **2.** (*с помощью синьки*) синкеләү, синкегә маныу; **подсини́ть бельё** керҙе синкегә маныу

**ПОДСКА́БЛИВАТЬ** *несов. см.* **подскобли́ть**

**ПОДСКАЗА́ТЬ** *сов. что, кому* и *без доп.* **1.** әйтеп тороу (ултырыу), аҫтыртын әйтеү **2.** *пе-*

*рен.* күрһәтеп биреү, юл күрһәтеү, уйға (фекергә) төшөрөү, өйрәтеп әйтеү; **жи́зненный о́пыт подска́зал** тормош тәжрибәһе юл күрһәтте

**ПОДСКА́ЗКА** *ж см.* **подсказа́ть — подска́зывать**

**ПОДСКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **подсказа́ть**

**ПОДСКАКА́ТЬ** *сов.* сабып килеү, килеп етеү

**ПОДСКА́КИВАТЬ I** *несов. см.* **подскака́ть**

**ПОДСКА́КИВАТЬ II** *несов. см.* **подскочи́ть**

**ПОДСКОБЛИ́ТЬ** *сов. что* ҡырыштырыу, ҡырып алыу, ҡырып төшөрөү; **подскобли́ть пома́рку** (яҙыуҙа) төҙәтелгәнде ҡырыштырыу

**ПОДСКОЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** һикереү, һикереп (ырғып) китеү; **подскочи́ть от ра́дости** ҡыуаныстан һикереп китеү **2.** *перен., разг.* ҡапыл күтәрелеү, кинәт менеү; **у больно́го подскочи́ла температу́ра** ауырыуҙың температураһы ҡапыл күтәрелде **3.** (*быстро побежать*) йүгереп (сабып, атылып) килеп етеү; **подскочи́ть к две́ри** ишек янына атылып килеп етеү

**ПОДСКРЕСТИ́** *сов. что; разг.* ҡырып таҙартыу (алыу); **подскрести́ сковоро́дку** табаны ҡырып таҙартыу

**ПОДСЛАСТИ́ТЬ** *сов. что* шәрбәтләй биреү, (әҙерәк) шәрбәтләү (татлы итеү); **подсласти́ть компо́т** компотты шәрбәтләү

**ПОДСЛА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **подсласти́ть**

**ПОДСЛЕ́ДСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тикшереү ҡарамағындағы (аҫтындағы) **2.** *в знач. сущ.* **подсле́дственный** *м* и **подсле́дственная** *ж; юр.* тикшереү аҫтындағы кеше

**ПОДСЛЕПОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** күҙгә насар, насар күргән; **подслепова́тый стари́к** насар күргән ҡарт **2.** (*плохо пропускающий свет*) яҡтыны насар үткәргән; **подслепова́тое око́шко** яҡтыны насар үткәргән тәҙрә **3.** (*тусклый — об источнике света*) насар (тоноҡ) яҡтыртҡан, бөләңгерт; **подслепова́тые звёзды** бөләңгерт йондоҙҙар

**ПОДСЛУ́ШАТЬ** *сов. кого-что* (һиҙҙермәй, йәшеренеп) тыңлап тороу, йәшеренеп (ҡасып) тыңлау; **подслу́шать чужу́ю та́йну** сит кешенең сер һөйләгәнен йәшерен тыңлап тороу

**ПОДСЛУ́ШИВАНИЕ** *с см.* **подслу́шивать**

**ПОДСЛУ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **подслу́шать**

**ПОДСМА́ТРИВАТЬ** *несов.* һиҙҙермәй (йәшеренеп) ҡарап тороу, ҡараштырғылау

**ПОДСМЕ́ИВАТЬСЯ** *несов. над кем-чем* көлөү, мыҫҡыллап көлөү (ирештереү)

**ПОДСМЕЯ́ТЬСЯ** *сов. см.* **подсме́иваться**

**ПОДСМОТРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **подсма́тривать** **2.** *кого-что* (*случайно увидеть*) күреп ҡалыу

**ПОДСНЕ́ЖНИК** *м* яҙ күрке, умырзая

**ПОДСНЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое ҡар аҫтындағы, ҡар аҫтында ҡышлаған; **подсне́жная клю́ква** ҡар аҫтында ҡышлаған мүк еләге

**ПОДСО́БНЫЙ,** -ая, -ое ярҙамсы, өҫтәмә; **подсо́бные рабо́чие** ярҙамсы эшселәр; **подсо́бный за́работок** өҫтәмә эш хаҡы

**ПОДСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **подсу́нуть**

**ПОДСОЗНА́НИЕ** *с; псих.* төпкөл аң

**ПОДСОЗНА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аңһыҙ, аңда асыҡланып етмәгән, аң-фекергә нигеҙләнмәгән, томанлы; **подсозна́тельное движе́ние** аңһыҙ хәрәкәт

**ПОДСОКРАТИ́ТЬ** *сов. что; разг.* ҡыҫҡарта (кәметә) төшөү (биреү); **подсократи́ть ру́копись** ҡулъяҙманы ҡыҫҡарта биреү; **подсократи́ть расхо́ды** сығымдарҙы кәметә төшөү

**ПОДСОЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тоҙ өҫтәү, өҫтәп тоҙ һалыу (һибеү); **подсоли́ть карто́шку** бәрәңгегә тоҙ өҫтәү **2.** *что, чего; разг.* (*засолить дополнительно*) тоҙлай биреү, йәнә бер аҙ тоҙлау; **подсоли́ть огурцо́в** йәнә бер аҙ ҡыяр тоҙлау

**ПОДСО́ЛНЕЧНИК** *м* көнбағыш

**ПОДСО́ЛНЕЧНЫЙ I,** -ая, -ое көнбағыш ...ы; **подсо́лнечные се́мечки** көнбағыш емдәре; **подсо́лнечное ма́сло** көнбағыш майы

**ПОДСО́ЛНЕЧНЫЙ II,** -ая, -ое *высок.* (*существующий под солнцем*) ҡояш аҫтындағы; **подсо́лнечные красо́ты** ҡояш аҫтындағы матурлыҡтар

**ПОДСО́ЛНУХ** *м; разг. см.* **подсо́лнечник**

**ПОДСО́СНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* **1.** имеҙгән, имеүҙән айырмаған; **подсо́сные свинома́тки** имеүҙән айырмаған сусҡалар **2.** имгән, имеүҙән айырылмаған; **подсо́сный телёнок** имгән быҙау

**ПОДСО́ХНУТЬ** *сов.* һурығыу, кибә төшөү; **земля́ подсо́хла** ер һурыҡҡан

**ПОДСПО́РЬЕ** *с* ярҙам, булышлыҡ, таяныс; **огоро́д — большо́е подспо́рье в хозя́йстве** йәшелсә баҡсаһы — хужалыҡта ҙур ярҙам

**ПОДСПУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое йәшерен, хәрәкәтһеҙ, беленмәй ятҡан; **подспу́дные мы́сли** йәшерен уйҙар

**ПОДСТА́ВИТЬ** *сов. что* **1.** (аҫтына) ҡуйыу, (аҫтына) ултыртыу; **подста́вить ведро́ под кран** биҙрәне һемәк аҫтына ҡуйыу **2.** һуғыу, ҡуйыу; **подста́вить подпо́рку под забо́р** ҡоймаға терәү һуғыу **3.** ҡуйыу, тотоу; **подста́вить лицо́ ве́тру** битте елгә ҡуйыу **4.** (яҡынырак) килтереп ҡуйыу, янына ҡуйыу; **подста́вить ле́стницу к окну́** баҫҡысты тәҙрәгә яҡынырак килтереп ҡуйыу **5.** (һаҡһыҙ) ҡуйыу, ҡалдырыу; **подста́вить фланг проти́внику** дошман яғынан флангыны һаҡһыҙ ҡалдырыу **6.** алмаштырыу; **подста́вить число́ в бу́квенное выраже́ние** хәрефле аңлатманы һан менән алмаштырыу ♦ **подста́вить но́гу (но́жку)** *кому; прям., перен.* аяҡ салыу, берәй эшкә ҡамасаулыҡ итеү

**ПОДСТА́ВКА** *ж* **1.** *см.* **подста́вить — подставлять** 1—5; **2.** (*подпорка*) терәк, терәү, таяу **3.** (*предмет, который подставляют подо что-л. или на который ставят что-л.*) аҫ, аҫлыҡ, аҫтаҡ

**ПОДСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **подста́вить**



4 зак. 2.0007.06

**ПОДСТАВНО́Й,** -ая, -ое **1.** аҫҡа (янға) ҡуймалы, һөйәп (терәп) ҡуймалы; **подставна́я скаме́ечка** янға ҡуймалы бәләкәй эскәмйә; **подставна́я ле́стница** һөйәп ҡуймалы баҫҡыс **2.** (*подложный*) ялған; **подставно́й свиде́тель** ялған шаһит

**ПОДСТАКА́ННИК** *м* стакан аҫты, стакан һауыты

**ПОДСТА́НЦИЯ** *ж* **1.** подстанция, бәләкәй станция **2.** (*промежуточная телефонная станция*) ике аралағы станция

**ПОДСТЁГИВАТЬ I** *несов. см.* **подстегну́ть** I

**ПОДСТЁГИВАТЬ II** *несов. см.* **подстегну́ть** II

**ПОДСТЕГНУ́ТЬ I** *сов. что*; *разг.* аҫтан (эргәнән) ҡаптырып (эләктереп) ҡуйыу; **подстегну́ть подкла́дку к плащу́** эслекте плащҡа аҫтан ҡаптырып ҡуйыу

**ПОДСТЕГНУ́ТЬ II** *сов. кого* **1.** сыбыртҡылау, ҡыуыу; **подстегну́ть коня́** атты сыбыртҡылау **2.** *перен.*, *разг.* ашыҡтырыу, ашыҡтыра төшөү; **подстегну́ть отстаю́щих** артҡа ҡалыусыларҙы ашыҡтыра төшөү

**ПОДСТЕЛИ́ТЬ** *сов. см.* **подостла́ть**

**ПОДСТЕРЕГА́ТЬ** *несов. см.* **подстере́чь**

**ПОДСТЕРЕ́ЧЬ** *сов. кого-что* һағалап (аңдып) тороу; **подстере́чь во́лка** бүре аңдып тороу

**ПОДСТИЛА́ТЬ** *несов. см.* **подостла́ть**

**ПОДСТИ́ЛКА** *ж* **1.** *см.* **подостла́ть** — **подстила́ть 2.** (*то, что подостлано*) түшәк; (*для скота*) түшәү, аҫлыҡ; **соло́менная подсти́лка** һалам түшәк

**ПОДСТИ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое (*аҫҡа йәйелә торған*) йәймә; **подсти́лочный материа́л** йәймә материал

**ПОДСТОРОЖИ́ТЬ** *сов. см.* **подстере́чь**

**ПОДСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **подстро́ить**

**ПОДСТРА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подстро́иться 2.** *страд. от* **подстра́ивать**

**ПОДСТРЕКА́ТЕЛЬ** *м* и **ПОДСТРЕКА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* ҡоткосо, ҡотортоусы, ҡотҡо таратыусы (һалыусы)

**ПОДСТРЕКА́ТЕЛЬСТВО** *с* ҡотҡо, ҡотортоу, ҡотҡо таратыу (һалыу)

**ПОДСТРЕКА́ТЬ** *несов. см.* **подстрекну́ть**

**ПОДСТРЕКНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*, *к чему* ҡотортоу, ҡотҡо һалыу (таратыу); **подстрекну́ть к ссо́ре** ыҙғышҡа ҡотортоу **2.** *что* (*возбудить какое-л. чувство*) ҡуҙғытыу, ҡорсотоу; **подстрекну́ть любопы́тство** *чьё-л. кемдеңдер* ҡыҙыҡһыныуын ҡуҙғытыу

**ПОДСТРЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **подстрели́ть**

**ПОДСТРЕЛИ́ТЬ** *сов. кого* атып алыу (төшөрөү, йығыу); **подстрели́ть пти́цу** ҡош атып алыу

**ПОДСТРИГА́ТЬ** *несов. см.* **подстри́чь**

**ПОДСТРИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подстри́чься 2.** *страд. от* **подстрига́ть**

**ПОДСТРИ́ЧЬ** *сов. кого-что* ҡырҡыу, тигеҙләп (ҡыҫҡартып) ҡырҡыу, (сәсте) ҡырҡып тигеҙләү; **подстри́чь но́гти** тырнаҡ ҡырҡыу; **подстри́чь во́лосы** сәсте ҡыҫҡартып ҡырҡыу; **подстри́чь дете́й** балаларҙың сәсен ҡырҡып тигеҙләү

**ПОДСТРИ́ЧЬСЯ** *сов.* сәс алдырыу; **подстри́чься в парикма́херской** бөҙрәханала сәс алдырыу

**ПОДСТРОГА́ТЬ** *сов. что* йыша биреү, бер аҙ йышыу, йышынҡырау; **подстрога́ть до́ску** таҡтаны йыша биреү

**ПОДСТРО́ИТЬ** *сов. что* **1.** төкәтеп (терәтеп) төҙөү (һалыу); **подстро́ить вера́нду к до́му** веранданы йортҡа терәтеп төҙөү **2.** -ға/-гә (ҡарап) көйләү; **подстро́ить гита́ру под роя́ль** гитараны роялгә көйләү **3.** *перен.* (аҫтыртын) этлек эшләү, эшләп ҡуйыу (*көтмәгән нәмәне*); **подстро́ить шу́тку** шаянлыҡ эшләп ҡуйыу

**ПОДСТРО́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* төкәтеп һалыныу, терәтеп төҙөлөү **2.** -ға/-гә (ҡарап) көйләнеү **3.** *разг.* (*присоединиться*) ҡушылыу

**ПОДСТРО́ЧНИК** *м* һүҙмә-һүҙ тәржемә

**ПОДСТРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бит (юл) аҫтындағы, аҫҡа төшөрөлгән; **подстро́чное примеча́ние** бит аҫтындағы иҫкәрмә **2.** (*буквальный*) һүҙмә-һүҙ; **подстро́чный перево́д** һүҙмә-һүҙ тәржемә

**ПО́ДСТУП** *м* **1.** *см.* **подступи́ть** — **подступа́ть** 1, 2, **подступи́ться** — **подступа́ться 2.** *обычно мн.* **по́дступы** яҡынлашыу (килеп инеү) юлы (ер, урын); **бой на по́дступах к го́роду** ҡалаға килеп ингән ерҙәрҙәге һуғыштар ♦ **по́дступа нет** *к кому кемгәлер* яҡын барырлыҡ та түгел, мөрәжәғәт итеп тә булмай

**ПОДСТУПА́ТЬ** *несов. см.* **подступи́ть**

**ПОДСТУПА́ТЬСЯ** *несов. см.* **подступи́ться**

**ПОДСТУПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *к кому* янына барыу, яҡын килеү; **сего́дня к нему́ и подступи́ть нельзя́** бөгөн уның янына барырлыҡ та түгел **2.** *к кому-чему* яҡын килеү, килеп етеү; **подступи́ть к го́роду** ҡалаға яҡын килеү **3.** (*быть в непосредственной близости*) яҡын (терәлеп, тейеп) тороу; **го́ры подступи́ли к са́мому мо́рю** тауҙар диңгеҙгә терәлеп тора **4.** төшөү, килеп тығылыу; **слёзы подступи́ли к глаза́м** күҙгә йәштәр килеп тығылды; **боль подступи́ла к се́рдцу** ауыртыу йөрәккә төштө

**ПОДСТУПИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **подступи́ть** 1, 2

**ПОДСУДИ́МЫЙ** *м* и **ПОДСУДИ́МАЯ** *ж* ғәйепләнеүсе; **допроси́ть подсуди́мого** ғәйепләнеүсенән һорау алыу

**ПОДСУ́ДНОСТЬ** *ж*; *юр.* судта ҡаралырға тейешлек, суд ҡарамағына инеү; **подсу́дность де́ла** эштең судта ҡаралырға тейешлеге

**ПОДСУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *юр.* судта ҡаралырға тейешле, суд ҡарамағына тапшырылырға тейешле; **подсу́дное де́ло** суд ҡарамағына тапшырылырға тейешле эш

**ПОДСУ́ЖИВАТЬ** *несов. кому*; *спорт.* яҡлашыу

**ПОДСУ́МОК** *м* патрон сумкаһы

**ПОДСУ́НУТЬ** *сов.* **1.** *что* аҫтына тығыу, (тығып, һалып) ҡуйыу; **подсу́нуть ве́щи под скаме́йку** әйберҙәрҙе эскәмйә аҫтына тығып ҡуйыу **2.** *что, чего* өҫтәп тығыу (һалыу), бер аҙ тығыу (һалыу); **подсу́нуть дров в костёр** костёрға утын өҫтәп һалыу **3.** *что*; *разг.* (*подложить незаметно*) һиҙҙермәй (белдермәй) килтереп һалыу (тығыу), иҫкәрмәҫтән тоттороу **4.** *кого-что* биреп ебәреү, һалыу (*кәрәкмәгән, насар нәмә*); **подсу́нуть гнилы́е я́блоки** серек алмалар һалыу

**ПОДСУ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **подсуши́ть**

**ПОДСУ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подсуши́ться 2.** *страд. от* **подсу́шивать**

**ПОДСУШИ́ТЬ** *сов. что* киптерә биреү (төшөү), әҙерәк (бер аҙ) киптереү; **подсуши́ть бельё** керҙе киптерә биреү; **подсуши́ть зерно́** ашлыҡты әҙерәк киптереү

**ПОДСУШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* кибә биреү (төшөү), әҙерәк (бер аҙ) кибеү, кибеңкерәү; **бельё подсуши́лось** кер кибеңкерәгән

**ПОДСУ́ШКА** *ж см.* **подсуши́ть** — **подсу́шивать**

**ПОДСЧЁТ** *м* **1.** *см.* **подсчита́ть** — **подсчи́тывать**; **подсчёт голосо́в** тауыштарҙы һанау **2.** *мн.* **подсчёты** иҫәпләүҙәр, иҫәп-хисап; **прове́рить подсчёты** иҫәп-хисапты тикшереү; **по мои́м подсчётам** минең иҫәпләүҙәр буйынса

**ПОДСЧИТА́ТЬ** *сов. кого-что* иҫәпләп (һанап) сығарыу; **подсчита́ть расхо́ды** сығымдарҙы иҫәпләп сығарыу

**ПОДСЧИ́ТЫВАНИЕ** *с см.* **подсчи́тывать**

**ПОДСЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **подсчита́ть**

**ПОДСЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **подосла́ть**

**ПОДСЫ́ПАТЬ** *сов. что, чего* **1.** өҫтәп һибеү (һалыу), һибә (һала) биреү; **подсы́пать со́ли в суп** ашҡа тоҙ өҫтәп һалыу **2.** (*насыпать тайком*) һиҙҙермәй һибеү (һалыу) **3.** (*сделать выше, насыпав дополнительно чего-л.*) өҫтәп өйөү, өйөп бейегәйтә биреү

**ПОДСЫПА́ТЬ** *несов. см.* **подсы́пать**

**ПОДСЫХА́ТЬ** *несов. см.* **подсо́хнуть**

**ПОДТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **подта́ять**

**ПОДТА́ЛКИВАТЬ** *несов. см.* **подтолкну́ть**

**ПОДТА́ПЛИВАТЬ I** *несов. см.* **подтопи́ть** I

**ПОДТА́ПЛИВАТЬ II** *несов. см.* **подтопить** II

**ПОДТАСОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** (хәрәмләшеп, мутлашып) аралаштырыу; **подтасова́ть ка́рты** кәрттәрҙе мутлашып аралаштырыу **2.** *перен.* боҙоп күрһәтеү; **подтасова́ть фа́кты** фактарҙы боҙоп күрһәтеү

**ПОДТАСО́ВКА** *ж см.* **подтасова́ть** — **подтасо́вывать**

**ПОДТАСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **подтасова́ть**

**ПОДТАЧА́ТЬ** *сов. что* аҫ һалып тегеү

**ПОДТА́ЧИВАТЬ I** несов. *см.* **подтача́ть**

**ПОДТА́ЧИВАТЬ II** *несов. см.* **подточи́ть**

**ПОДТАЩИ́ТЬ** *сов. кого-что* һөйрәп (тартып) килтереү; **подтащи́ть ле́стницу к окну́** баҫҡысты тәҙрә янына һөйрәп килтереү

**ПОДТА́ЯТЬ** *сов.* ирей (ирет) башлау, әҙерәк (бер аҙ) ирей (иретеү); **лёд подта́ял** боҙ ирей башлаған; **сего́дня подта́яло** *безл.* бөгөн бер аҙ иреткән

**ПОДТВЕРДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое раҫлаусы, дөрөҫләүсе, раҫлай (дөрөҫләй) торған; **подтверди́тельная телегра́мма** раҫлаусы телеграмма; **подтверди́тельный ука́з** раҫлай торған фарман

**ПОДТВЕРДИ́ТЬ** *сов. что* раҫлау, дөрөҫләү; **подтверди́ть своё мне́ние фа́ктами** үҙ фекереңде факттар менән раҫлау

**ПОДТВЕРДИ́ТЬСЯ** *сов.* раҫланыу, дөрөҫләнеү, раҫ килеү, дөрөҫкә сығыу; **на́ши предположе́ния подтверди́лись** беҙҙең фараздарыбыҙ дөрөҫкә сыҡты

**ПОДТВЕРЖДА́ТЬ** *несов. см.* **подтверди́ть**

**ПОДТВЕРЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подтверди́ться 2.** *страд. от* **подтвержда́ть**

**ПОДТВЕРЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **подтверди́ть** — **подтвержда́ть 2.** дөрөҫләүсе (раҫлаусы) нәмә

**ПОДТЁК** *м* **1.** ағып төшкән эҙ; **подтёки на обо́ях** обойҙағы һыу төшкән эҙҙәр **2.** (*синяк на коже*) ҡара янған (көйгән) ер, күгәреп сыҡҡан урын, ҡан һауған урын

**ПОДТЕКА́ТЬ** *несов. см.* **подте́чь**

**ПОДТЕ́КСТ** *м* төптә ятҡан мәғәнә

**ПОДТЁЛОК** *м* башмаҡ

**ПОДТЕРЕ́ТЬ** *сов. что* һөртөп алыу; **подтере́ть грязь на полу́** иҙәндәге бысраҡты һөртөп алыу

**ПОДТЕСА́ТЬ** *сов. что* юна (сутлай) биреү, әҙерәк (бер аҙ) юныу (сутлау); **подтеса́ть бревно́** бүрәнәне әҙерәк сутлау

**ПОДТЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **подтеса́ть**

**ПОДТЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** (аҫтына) ағып инеү; **вода́ подтекла́ под шкаф** һыу шкаф аҫтына ағып ингән **2.** *разг.* (*припухнуть*) (ҡара янып) күгәреп сығыу

**ПОДТИРА́ТЬ** *несов. см.* **подтере́ть**

**ПОДТОЛКНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** төртөп алыу (ҡуйыу), еңелсә этеп ебәреү; **подтолкну́ть сосе́да ло́ктем** күршене терһәк менән төртөп алыу **2.** *перен.*, *разг.* (*побудить к чему-л.*) этәреү, этәргес биреү

**ПОДТОПИ́ТЬ I** *сов. что*; *разг.* өҫтәп яғыу, әҙерәк (бер аҙ) яғып алыу; **подтопи́ть печь** мейескә өҫтәп яғыу

**ПОДТОПИ́ТЬ II** *сов. что, чего*; *разг.* өҫтәп иретеү, тағы (әҙерәк, бер аҙ) иретеп алыу; **подтопи́ть ма́сла** әҙерәк май иретеп алыу

**ПОДТОЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* үткерләй төшөү (биреү), әҙерәк (бер аҙ) үткерләп алыу; **подточи́ть топо́р** балтаны әҙерәк үткерләп алыу **2.** *что* (*о насекомых, грызунах*) (аҫтан) ашау (ҡырҡыу, кимереү); **червь подточи́л я́блоко** алманы ҡорт ашаған **3.** *что* (*о воде, ветре и т.п.*) аҫтан ашау (өңөү); **река́ подточи́ла бе́рег** йылға ярҙы аҫтан ашаған **4.** *кого-что*; *перен.* (*ослабить*) ҡаҡша-

тыу; **боле́знь подточи́ла его́** сир уны ҡаҡшатҡан ♦ **кома́р но́су (но́са) не подто́чит** *см.* **кома́р**

**ПОДТРУ́НИВАТЬ** *несов. см.* **подтруни́ть**

**ПОДТРУНИ́ТЬ** *сов. над кем-чем* шаяртыу, ирештереү

**ПОДТЫКА́ТЬ** *несов. см.* **подоткну́ть**

**ПОДТЯ́ГИВАНИЕ** *с см.* **подтя́гивать**, **подтя́гиваться**

**ПОДТЯ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **подтяну́ть**

**ПОДТЯ́ГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подтяну́ться 2.** *страд. от* **подтя́гивать**

**ПОДТЯ́ЖКА** *ж* **1.** *см.* **подтяну́ть — подтя́гивать** 1; **2.** *мн.* **подтя́жки** тарттырғыс; **наде́ть подтя́жки** тарттырғыс кейеү

**ПОДТЯ́НУТОСТЬ** *ж* ыҡсымлыҡ, йыйнаҡлыҡ

**ПОДТЯ́НУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **подтяну́ть 2.** *прил.* (*ввалившийся — о животе, боках*) эскә тартылған **3.** *прил.*; *перен.* (*строгий, сдержанный*) ыҡсым, йыйнаҡ; **подтя́нутый вид** йыйнаҡ ҡиәфәт

**ПОДТЯНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тартып (һөйрәп) килтереү; **подтяну́ть ло́дку к бе́регу** кәмәне яр буйына тартып килтереү **2.** *кого-что* (*затащить подо что-л.*) аҫҡа (аҫтына) тартыу (индереү), тартып алып инеү; **подтяну́ть са́ни под наве́с** сананы лапаҫ аҫтына индереү **3.** *кого-что* туплау, йыйыу; **подтяну́ть войска́ к го́роду** ғәскәрҙе ҡала янына туплау **4.** *что* тарта (тарттыра, ҡыҫа) биреү (төшөү); **подтяну́ть по́яс** билбауҙы ҡыҫа төшөү; **подтяну́ть подпру́ги** айылды тарта биреү **5.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* алға һөйрәү (әйҙәү, этәреү); **подтяну́ть отстаю́щих** артта ҡалыусыларҙы алға әйҙәү **6.** *кому* и *без доп.* (*подпеть*) ҡушылыу, ҡушылып китеү (*йырға*)

**ПОДТЯНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** күтәрелеү, кәүҙәне күтәреү; **подтяну́ться на рука́х** ҡулдарҙа кәүҙәне күтәреү **2.** йыйылыу, тупланыу; **войска́ подтяну́лись к грани́це** ғәскәрҙәр сик буйына тупланды **3.** *перен.*, *разг.* яҡшыраҡ эшләй башлау, тырыша башлау; **подтяну́ться в рабо́те** эштә тырыша башлау **4.** *разг.* (*о животе*, *губах и т.п.*) ыҡсымланыу, турайыу, тартылыу

**ПОДУ́МАТЬ** *сов.* **1.** *о ком-чём*, *над чем* уйлау, уйлап ҡарау, фекер йөрөтөү, уйлап тороу, уйға сумыу (талыу); **на́до поду́мать об э́том** был турала уйлап ҡарарға кәрәк **2.** (*прийти к какой-л. мысли*) фекергә килеү **3.** *во 2 л. ед. ч. буд. вр.* **поду́маешь** *в знач. межд.*; *разг.* (*для выражения иронии*, *пренебрежения*) харап икән, иҫең киткән икән ♦ **поду́мать то́лько!** уйлап ҡараһаң!

**ПОДУ́МЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** уйлаштырғылау, уйлаштырыу, ваҡыт-ваҡыт уйлап ҡуйыу; **поду́мывать об отъе́зде** китеү тураһында уйлаштырыу **2.** ниәтләү, иҫәп тотоу; **я давно́ поду́мывал уе́хать** мин күптән китергә ниәтләгән инем

**ПОДУРА́ЧИТЬ** *сов. кого*; *разг.* шаяртып алыу, шаяртыу

**ПОДУРА́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шаярыу, шаярып (ҡотороп) алыу

**ПОДУРНЕ́ТЬ** *сов.* йәмһеҙләнә биреү (төшөү), бер аҙ йәмһеҙләнеү; **лицо́ её подурне́ло** йөҙө йәмһеҙләнә төшкән

**ПОДУ́ТЬ** *сов.* **1.** иҫә (өрә) башлау; **к ве́черу поду́л се́верный ве́тер** кискә табан төньяҡ еле иҫә башланы **2.** (бер аҙ) иҫеп (өрөп) тороу; **ве́тер поду́ет и переста́нет** ел бер аҙ иҫер ҙә туҡтар

**ПОДУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **подучи́ть**

**ПОДУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подучи́ться 2.** *страд. от* **поду́чивать**

**ПОДУЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* (бер аҙ) өйрәтеп алыу; **подучи́ть молодо́го рабо́чего** йәш эшсене өйрәтеп алыу **2.** *что* (*выучить лучше*) яҡшыраҡ өйрәнеү, уҡыңҡырау, өйрәнә биреү (төшөү); **подучи́ть арифме́тику** арифметиканы яҡшыраҡ өйрәнеү **3.** *кого* (*подговорить*) ҡотортоу; **он меня́ подучи́л соврА́ть** ул мине алдашырға ҡотортто

**ПОДУЧИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* әҙерәк (бер аҙ) уҡыу (уҡып алыу), әҙерәк (бер аҙ) өйрәнеү (өйрәнеп алыу)

**ПОДУ́ШЕЧКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **поду́шка** 1; **2.** *мн.* **поду́шечки** (*вид конфет*) дүрткел кәнфит

**ПОДУШИ́ТЬ I** *сов. кого*; *разг.* (*задушить*) быуып (тамаҡлап) сығыу (ташлау); **волк подуши́л мно́го ове́ц** бүре күп һарыҡты тамаҡлап сыҡҡан

**ПОДУШИ́ТЬ II** *сов. кого-что* әҙерәк (бер аҙ) хушбуй һөртөү, (һөртөштөрөү, һөрткөләү), хушбуй (һөртөп, һөртөштөрөп, һөрткөләп) алыу; **подуши́ть плато́к** яулыҡҡа әҙерәк хушбуй һөртөү

**ПОДУШИ́ТЬСЯ** *сов.* әҙерәк (бер аҙ) хушбуйланыу, хушбуй һөртөп алыу

**ПОДУ́ШКА** *ж* **1.** мендәр, яҫтыҡ; **пухо́вая поду́шка** мамыҡ мендәр; **взбить поду́шку** мендәр ҡабартыу **2.** *тех.* түш, күкрәк (*төрлө ҡоролмала, механизмда*)

**ПОДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое *ист.* йән башынан алына (түләнә) торған; **поду́шная по́дать** йән башынан түләнә торған һалым

**ПОДФА́РНИК** *м* подфарник

**ПОДХАЛИ́М** *м* ялағай, ҡуштан, ярамһаҡ

**ПОДХАЛИМА́Ж** *м*; *разг. см.* **подхали́мство**

**ПОДХАЛИ́МНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ялағайланыу, ярамһаҡланыу, ҡуштанланыу

**ПОДХАЛИ́МСТВО** *с* ялағайлыҡ, ярамһаҡлыҡ, ҡуштанлыҡ

**ПОДХВАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тотоп (күтәреп) алыу, эләктереп тотоу; **подхвати́ть больно́го под мы́шки** ауырыуҙы ҡултығынан тотоп алыу **2.** *кого-что* (*не дать упасть*) йығылтмай тотоп алыу **3.** *кого-что* (*схватить*) эләктереп алыу; **подхвати́ть ша́пку** бүректе эләктереп алыу **4.** *что*; *перен.*, *разг.* эләктереү; **подхвати́ть грипп** грипп эләктереү **5.** *без доп.* (*стремительно рвануться — о лошадях и др.*) ҡапыл ҡуҙғалып китеү, ҡапыл сабып китеү (*атҡа һ.б. ҡара-*

*та*) **6.** *что* элэктереп алыу, элеп алып китеү, күтәреп алыу; **подхвати́ть почи́н** башланғысты күтәреп алыу **7.** *что* и *без доп.* (*начать подпевать*) күтәреп ебәреү (алыу), ҡушылып китеү; **дру́жно подхвати́ть пе́сню** йырҙы дәррәү күтәреп алыу

**ПОДХВА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **подхвати́ть**

**ПОДХЛЕСТНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* ҡамсылау; **подхлестну́ть коня́** атты ҡамсылау **2.** *перен., разг.* ашыҡтырыу, ашыҡтыра төшөү; **подхлестну́ть отстаю́щих** артта ҡалыусыларҙы ашыҡтырыу

**ПОДХЛЁСТЫВАТЬ** *несов. см.* **подхлестну́ть**

**ПОДХО́Д** *м* **1.** *см.* **подойти́** 1, 3, 5; **2.** (*место*) килеү (барыу, яҡынайыу) юлы; **удо́бный подхо́д к реке́** йылғаға уңайлы килеү юлы **2.** ҡараш, мөнәсәбәт, яҡынайыу юлы; **пра́вильный подхо́д к де́лу** эшкә дөрөҫ ҡараш; **найти́ подхо́д к челове́ку** кешегә яҡынайыу юлын табыу

**ПОДХОДИ́ТЬ** *несов. см.* **подойти́**

**ПОДХОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **подходи́ть 2.** *прил.*; *в разн. знач.* ҡулайлы, ярайлы, яйлы; **подходя́щее ме́сто** ҡулайлы урын; **найти́ подходя́щие слова́** ҡулайлы һүҙҙәр табыу; **подходя́щее помеще́ние** ярайлы бина

**ПОДХОМУ́ТНИК** *м* и **ПОДХОМУ́ТИНА** *ж* ҡамыт кейеҙе

**ПОДЦЕПИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* тағыу; **подцепи́ть ваго́н к по́езду** вагонды поезға тағыу **2.** *кого-что* элэктереү, элэктереп алыу; **подцепи́ть бревно́ багро́м** бүрәнәне багор менән элэктереп алыу **3.** *что*; *перен.* элэктереү, тейҙереү; **подцепи́ть на́сморк** тымау элэктереү ♦ **подцепи́ть на у́дочку** *см.* **у́дочка**

**ПОДЦЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* (артына) йәбешеү (аҫылыныу), йәбешеп аҫылыныу

**ПОДЦЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **подцепи́ть**

**ПОДЦЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подцепи́ться 2.** *страд. от* **подцепля́ть**

**ПОДЧА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **подча́лить**

**ПОДЧА́ЛИТЬ** *сов.* **1.** килеп туҡтау; **подча́лить к при́стани** пристангә килеп туҡтау **2.** *что* (элэктереп) тартып алыу (килтереү), килтереп туҡтатыу; **подча́лить ло́дку к ба́рже** кәмәне баржа янына килтереп туҡтатыу; **подча́лить бревно́ к ло́дке** бүрәнәне кәмә янына тартып килтереү

**ПОДЧА́С** *нареч.* ҡайһы ваҡыт(та), ҡайһы саҡ(та), ҡайһы берҙә; **подча́с быва́ет тру́дно** ҡайһы саҡ ҡыйын булып китә

**ПОДЧЕЛЮСТНО́Й,** -ая, -ое *анат.* яңаҡ аҫты ...ы; **подчелюстна́я железа́** яңаҡ аҫты биҙе

**ПОДЧЁРКИВАТЬ** *несов. см.* **подчеркну́ть**

**ПОДЧЁРКНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **подчеркну́ть 2.** *прил.* һиҙелеп торған, күҙгә бәрелеп торған, айырым; **подчёркнутое внима́ние** һиҙелеп торған иғтибар; **подчёркнутая ве́жливость** күҙгә бәрелеп торған ихтирам

**ПОДЧЕРКНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** аҫтына һыҙыу; **подчеркну́ть в ру́кописи осо́бо ва́жные места́** ҡульяҙмала айырыуса мөһим урындарҙың аҫтына һыҙыу **2.** *перен.* (*особо выделить*) айырып (баҫым яһап) әйтеү, айырып алыу; **подчеркну́ть ва́жность вопро́са** мәсьәләнең мөһимлеген айырып әйтеү

**ПОДЧЕРНИ́ТЬ** *сов. что* ҡарайтыу, ҡараға буяу; **подчерни́ть бро́ви** ҡаш ҡарайтыу

**ПОДЧИНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **подчини́ть** — **подчиня́ть**, **подчини́ться** — **подчиня́ться 2.** *грам.* эйәртеү; **сло́жное предложе́ние с подчине́нием** эйәртеүле ҡушма һөйләм

**ПОДЧИНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **подчини́ть 2.** *в знач. сущ.* **подчинённый** *м* и **подчинённая** *ж* буйһонған (ҡул аҫтындағы) кеше

**ПОДЧИНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* эйәртеүле; **подчини́тельная связь предложе́ний** һөйләмдәрҙең эйәртеүле бәйләнеше

**ПОДЧИНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*покорить*) буйһондороу, баш эйҙереү **2.** *кого-что, кому-чему* буйһондороу, хеҙмәт иттереү; **подчини́ть своему́ влия́нию** үҙ йоғонтоңа буйһондороу **3.** *кому-чему* буйһондороу, ҡарамағына биреү (тапшырыу); **подчини́ть отде́льные учрежде́ния министе́рствам** ҡайһы бер учреждениеларҙы министрлыҡтар ҡарамағына тапшырыу **4.** *чему*; *грам.* эйәртеү

**ПОДЧИНИ́ТЬСЯ** *сов.* буйһоноу, баш эйеү, ҡарамағында булыу; **подчини́ться прика́зу** приказға буйһоноу; **подчини́ться го́лосу со́вести** выждан ҡушыуына буйһоноу

**ПОДЧИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **подчини́ть**

**ПОДЧИНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **подчини́ться 2.** *страд. от* **подчиня́ть**

**ПОДЧИ́СТИТЬ** *сов. что* **1.** таҙартыу, таҙартып алыу (ҡуйыу); **подчи́стить в саду́** баҡсаны таҙартып алыу **2.** ҡырып юйыу, ҡырыу; **подчи́стить оши́бочно напи́санную бу́кву** яңылыш яҙылған хәрефте ҡырып юйыу **3.** *разг.*, бөтөрөү, ҡырып алып (тотоноп, ашап) бөтөрөү, таҙартып ҡуйыу; **подчи́стить все запа́сы** барлыҡ һаҡламды бөтөрөү

**ПОДЧИ́СТКА** *ж* **1.** *см.* **подчи́стить** — **подчища́ть 2.** *разг.* (*подтёртое место в тексте*) ҡырып юйылған урын

**ПОДЧИТА́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* (тағы) уҡыу, уҡып алыу; **подчита́ть докла́д пе́ред выступле́нием** сығыш алдынан докладты уҡып алыу **2.** *типогр.* ҡыҫҡырып уҡыу (*копияны оригинал менән икенсе берәүҙең сағыштырыуы өсөн*)

**ПОДЧИЩА́ТЬ** *несов. см.* **подчи́стить**

**ПОДШЁРСТОК** *м* мамыҡ, йөн мамығы (*эре йөн аҫтындағы*)

**ПОДШЕ́ФНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шефлыҡҡа алынған; **подше́фный де́тский дом** шефлыҡҡа алынған балалар йорто **2.** *в знач. сущ.* **подше́фный** *м* и **подше́фная** *ж* шефлыҡҡа алынған кеше

**ПОДШИВА́ТЬ** *несов. см.* **подши́ть**

**ПОДШИ́ВКА** *ж* **1.** *см.* **подши́ть — подшива́ть 2.** *разг.* төпләм; **подши́вка газе́т** гәзит(тәр) төпләме **3.** *разг.* әҙеп; **подши́вка пала́са** балаҫ әҙебе; **подши́вка подо́ла** итәк әҙебе

**ПОДШИ́ПНИК** *м* подшипник; **ша́риковый подши́пник** шариклы подшипник

**ПОДШИ́ПНИКОВЫЙ,** -ая, -ое подшипник ...ы; **подши́пниковый заво́д** подшипник заводы

**ПОДШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (эстән, аҫтан) тегеп ҡуйыу; **подши́ть подкла́дку к пальто́** пальтоға эслек тегеп ҡуйыу **2.** аҫ (олтан, табан) һалыу, табанлау, төпләү; **подши́ть ва́ленки** бийма табанлау **3.** (*подрубить*) ситен бөгөү; **подши́ть подо́л** итәктең ситен бөгөү; **4.** теркәп (тегеп, төпләп) ҡуйыу; **подши́ть докуме́нт к де́лу** документты делоға теркәп ҡуйыу; **подши́ть газе́ты за ме́сяц** айлыҡ гәзиттәрҙе төпләп ҡуйыу

**ПОДШЛЕ́МНИК** *м* шлем аҫлығы (*шлем, каска эсенән кейелә*)

**ПОДШПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **подшпи́лить**

**ПОДШПИ́ЛИТЬ** *сов. что*; *разг.* (ҡаҙап ҡуйыу) *шпилька менән*; **подшпи́лить во́лосы** сәсте ҡаҙап ҡуйыу

**ПОДШТУКАТУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **подштукату́рить**

**ПОДШТУКАТУ́РИТЬ** *сов. что* штукатуркаһын төҙәткеләү, штукатурлап алыу; **подштукату́рить потоло́к** түшәмде штукатурлап алыу

**ПОДШТУ́РМАН** *м* штурман ярҙамсыһы

**ПОДШУТИ́ТЬ** *сов. над кем-чем* шаяртыу, ҡыҙыҡ (мәҙәк) итеү; **подшути́ть над прия́телем** дуҫты ҡыҙыҡ итеү

**ПОДШУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **подшути́ть**

**ПОДЪ...** *приставка см.* **под...**

**ПОДЪЕДА́ТЬ** *несов. см.* **подъе́сть**

**ПОДЪЕ́ЗД** *м* **1.** *см.* **подъезжа́ть** 1, 2; **2.** (*место*) килеп инеү (сығып китеү) юлы; **подъе́зд к мосту́** күпергә килеп инеү юлы **3.** (*вход в здание*) йорт ишеге, ишек; **пара́дный подъе́зд** урам яҡтағы (төп) ишек

**ПОДЪЕ́ЗДИТЬ** *сов. кого*; *спорт., воен.* өйрәтеү (*еккегә йәки эйәргә*); **подъе́здить ло́шадь** ат өйрәтеү

**ПОДЪЕЗДНО́Й,** -ая, -ое инә (килә) торған (*берәй ергә*), сыға торған (*берәй ерҙән*); **подъездны́е пути́** инә торған юлдар

**ПОДЪЕЗЖА́ТЬ** *несов. см.* **подъе́хать**

**ПОДЪЁМ** *м* **1.** *см.* **подня́ть — поднима́ть** 1—4, 7, 10, 11, 14, **подня́ться — поднима́ться** 1, 3—6, 9, 11; **подъём фла́га** флаг күтәреү **2.** күтәрелеш, үҫеш; **подъём се́льского хозя́йства** ауыл хужалығының күтәрелеше **3.** (*воодушевление*) дәртлелек, күтәренкелек, дәрт, күтәренке күңел; **духо́вный подъём** рухи күтәренкелек; **говори́ть с подъёмом** дәрт менән һөйләү; **арти́сты игра́ли с подъёмом** артистар дәрт менән уйнаны **4.** үр, үрләс; **круто́й подъём** текә үр **5.** (*ног, обуви*) алҡым, йөҙлөк; **сапоги́ с ни́зким подъёмом** тар алҡымлы итек **6.** (*сигнал к пробуждению или отправлению в поход*) уяныу, йоҡонан тороу; **протруби́ть подъём** йоҡонан торорға сигнал биреү ♦ **лёгок (лёгкий) на подъём** еңел һөйәкле (ҡуҙғалыусан); **тяжёл (тяжёлый) на подъём** ауыр һөйәкле (ҡуҙғалыусан), әкрен ҡыймылдаусан

**ПОДЪЁМНИК** *м* күтәргес (*күтәреү механизмы*)

**ПОДЪЁМНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күтәреү ...ы; **подъёмный кран** күтәреү краны; **подъёмные рабо́ты** күтәреү эштәре **2.** (*устроенный так, что его можно поднять*) күтәрелмәле, асылмалы, алынмалы; **подъёмный мост** күтәрелмәле күпер **3.** *в знач. сущ.* **подъёмные** *мн. см.* **подъёмные де́ньги** ♦ **подъёмные де́ньги** яңы эш урынына барыу аҡсаһы

**ПОДЪЕ́СТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* аҫтан (төптән) кимереү, төбөн тишеү; **мы́ши подъе́ли сте́бли** сысҡандар һабаҡтарҙы кимергән **2.** *прост.* ашап бөтөрөү; **подъе́сть после́дние запа́сы** һуңғы запастарҙы ашап бөтөрөү

**ПОДЪЕ́ХАТЬ** *сов.* **1.** килеү, килеп туҡтау (етеү); **подъе́хал автомоби́ль** автомобиль килеп туҡтаны; **мы подъе́хали к го́роду** беҙ ҡалаға килеп еттек **2.** *разг.* килеп төшөү, барып сығыу; **подъе́хать к обе́ду** төш ваҡытына килеп төшөү **3.** *перен.*, *прост.* яйын (көйөн) табыу, ҡылын тартып ҡарау; **к нему́ на́до уме́ть подъе́хать** уның көйөн таба белергә кәрәк

**ПОДЪЯ́ЗОК** *м* (*рыба*) оптосаҡ

**ПОДЪЯЗЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* тел аҫты ...ы; **подъязы́чная железа́** тел аҫты биҙе

**ПОДЪЯРЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* (*подневольный*) ҡоллоҡтағы, ирекһеҙ; **подъяре́мный труд** ирекһеҙ хеҙмәт

**ПОДЫГРА́ТЬ** *сов. кому-чему*; *разг.* **1.** (йырлаусыға) ҡушылып уйнау; **подыгра́ть певцу́ на гита́ре** йырсыға гитарала ҡушылып уйнау **2.** (*помочь партнёру*) уйын менән ярҙамлашыу (ярҙам итеү)

**ПОДЫ́ГРЫВАТЬ** *несов. см.* **подыгра́ть**

**ПОДЫСКА́ТЬ** *сов. кого-что* табыу, эҙләп табыу; **подыска́ть рабо́ту** эш эҙләп табыу

**ПОДЫ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **подыска́ть**

**ПОДЫТО́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **подыто́жить**

**ПОДЫТО́ЖИТЬ** *сов. что* йомғаҡлау, йомғаҡ яһау; **подыто́жить расхо́ды** сығымдарға йомғаҡ яһау

**ПОДЫХА́ТЬ** *несов. см.* **подо́хнуть**

**ПОДЫША́ТЬ** *сов.* **1.** һулау, әҙерәк (бер аҙ) һулыш (тын) алыу; **подыша́ть све́жим во́здухом** бер аҙ саф һаua һулау **2.** *на что* (*несколько раз дохну́ть*) өрөү, өргөләү

**ПОЕДА́ТЬ** *несов.* ашау, ашап бөтөрөү

**ПОЕДИ́НОК** *м* **1.** алыш; **вы́звать на поеди́нок** алышҡа саҡырыу; **вы́йти на поеди́нок** алышҡа

сығыу **2.** көрәш, ярыш; **спорти́вный поеди́нок** спорт көрәше; **слове́сный поеди́нок** һүҙ көрәше

**ПО́ЕДОМ** и **ПОЕДО́М: по́едом есть** *кого*; *прост.* көн күрһәтмәү, ашап алып барыу, тереләй ашарҙай булыу

**ПОЁЖИВАТЬСЯ** *несов.* көжрәйеү, шоҡрайыу, ҡорошоу

**ПОЁЖИТЬСЯ** *сов.* көжрәйеп (шоҡрайып, ҡорошоп) тороу

**ПО́ЕЗД** *м* **1.** поезд; **ско́рый по́езд** тиҙ йөрөшлө поезд; **по́езд метро́** метро поезы **2.** (*вереница повозок, машин и т.п.*) каруан, теҙмә ♦ **сва́дебный по́езд** туй каруаны (*туйҙа ҡатнашыусылар ултырған бер нисә арба, сана йәки машина*)

**ПОЕ́ЗДИТЬ** *сов.* йөрөп алыу (ҡайтыу); **пое́здить на ло́шади** атта йөрөп алыу; **пое́здить по гостя́м** төрлө ерҙә ҡунаҡта йөрөп ҡайтыу

**ПОЕ́ЗДКА** *ж* йөрөп (барып) ҡайтыу, ҡыҫҡа сәфәр; **верну́ться из пое́здки** ҡыҫҡа сәфәрҙән ҡайтыу; **пое́здка на юг** көньяҡҡа барып ҡайтыу

**ПОЕЗДНО́Й,** -ая, -ое поезд ...ы; **поездна́я брига́да** поезд бригадаһы

**ПОЁМ** *м*; *разг.* (*пойма*) һыубаҫар (һыу баҫа торған) туғай (ер, урын)

**ПОЁМНЫЙ,** -ая, -ое һыу баҫа торған, һыубаҫар туғай ...ы, һыубаҫар; **поёмные луга́** һыу баҫа торған болондар

**ПОЕ́СТЬ** *сов.* **1.** *что*, *чего* и *без доп.* ашау, ашап (ҡапҡылап) алыу, тамаҡ ялғау; **пое́сть пе́ред доро́гой** юлға сығыр алдынан ашап алыу **2.** *что*; *разг.* ашап бөтөрөү; **ры́бы пое́ли весь корм** балыҡтар бөтә аҙыҡты ашап бөтөргән **3.** *что*; *разг.* (*изъесть*) ҡырҡып (киҫеп, ашап) бөтөү; **моль пое́ла мех** көйә тирене ҡырҡып бөткән

**ПОЕ́ХАТЬ** *сов.* **1.** китеү, барыу, китеп барыу; **пое́хать на по́езде** поезда барыу; **пое́хать в дом о́тдыха** ял йортона китеү **2.** һалыулау, һалыулап китеү; **са́ни пое́хали в сто́рону** сана бер ситкә һалыулап китте

**ПОЖА́ДНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* һаранланыу, һаранлыҡ күрһәтеү

**ПОЖАЛЕ́ТЬ** *сов. см.* **жале́ть**; **пожале́ть о поте́рянном вре́мени** ваҡыт бушҡа үткәнгә үкенеү

**ПОЖА́ЛОВАТЬ** *сов.*; *уст.* **1.** *см.* **жа́ловать** 1; **2.** (*прийти*) килеү, килеп сығыу; **прошу́ пожа́ловать ко мне в го́сти** миңә ҡунаҡҡа килеүегеҙҙе һорайым **3.** *повел.* **пожа́луйте** рәхим итегеҙ; **пожа́луйте ко мне в ко́мнату** минең бүлмәгә рәхим итегеҙ ♦ **добро́ пожа́ловать** *см.* **добро́** I

**ПОЖА́ЛОВАТЬСЯ** *сов. см.* **жа́ловаться**

**ПОЖА́ЛУЙ** *вводн. сл.* и *частица* ихтимал, бәлки; **он, пожа́луй, придёт** уның килеүе ихтимал; **чаю хотите? — Пожалуй** сәй эсәһегеҙме? — Эйе, бәлки

**ПОЖА́ЛУЙСТА** *частица* **1.** (*вежливое обращение при просьбе, приказании*) -сы/-се, рәхим итеп, зинһар; **да́йте мне, пожа́луйста, воды́** миңә һыу бирегеҙсе; **пожа́луйста, не шуми́те** зинһар, шауламағыҙ; **пожа́луйста, откро́й дверь** зинһар, ишек ас **2.** (*вежливое выражение согласия*) рәхим итегеҙ; **мо́жно зайти́? — Пожа́луйста** инергә мөмкинме? — Рәхим итегеҙ ♦ **скажи́(те) пожа́луйста!** *разг.* бына һиңә (һеҙгә) кәрәк булһа!

**ПОЖА́Р** *м* янғын, ут; **туши́ть пожа́р** янғын һүндереү ♦ **как на пожа́р (бежа́ть, лете́ть и т.п.)** артына ут ҡапҡандай (ашығыу, сабыу һ.б.); **не на пожа́р** янғын һүндерергә түгелдер әле, һис тә ҡабаланырға түгел

**ПОЖА́РИТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡыҙҙырыу, ҡурыу, ҡыҙҙырып (ҡурып) алыу; **пожа́рить ры́бу подо́льше** балыҡты оҙағыраҡ ҡурыу **2.** *что*, *чего* ҡурып (ҡыҙҙырып) алыу (ҡуйыу); **пожа́рить котле́т** котлеттарҙы ҡурып ҡуйыу

**ПОЖА́РИЩЕ** *с* (*пепелище*) янғын (ут) урыны

**ПОЖА́РНИК** *м*; *разг. см.* **пожа́рный** 2

**ПОЖА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** янғын (ут) һүндереү ...ы; **пожа́рный дым** янғын төтөнө; **пожа́рная маши́на** янғын машинаһы **2.** *в знач. сущ.* **пожа́рный** *м* янғын һүндереүсе ♦ **в пожа́рном поря́дке** бик ҙур ашығыслыҡ менән; **на вся́кий пожа́рный слу́чай** кәрәк була ҡалһа тип

**ПОЖА́ТЬ I** *сов. что* ҡыҫыу; **пожа́ть ру́ку** ҡул ҡыҫыу ♦ **пожа́ть плеча́ми** иңбашты һикертеп ҡуйыу (*аптырау белдереп*)

**ПОЖА́ТЬ II** *сов. что* **1.** *уст.*, *прост.* урыу; **пожа́ть рожь** арыш урыу; **что посе́ешь, то и пожнёшь** *посл.* ни сәсһәң, шуны урырһың **2.** *перен.*, *высок.* рәхәтен күреү, изгелеген күреү

**ПОЖА́ТЬСЯ** *сов.* бөршәйеү, шөкрәйеү ♦ **пожа́ться от хо́лода** һыуыҡтан бөршәйеү

**ПОЖЕВА́ТЬ** *сов.* **1.** (*жевать некоторое время*) (бер аҙ) сәйнәп алыу, (бер аҙ) көйшәү **2.** *что*, *чего*; *прост.* (*поесть немного*) (бер аҙ) ашап (ҡапҡылап) алыу

**ПОЖЕЛА́НИЕ** *с* теләк, теләү; **пожела́ние успе́ха** уңыш теләү; **до́брые пожела́ния** изге теләктәр

**ПОЖЕЛА́ТЬ** *сов. что*, *чего* теләү; **пожела́ть счастли́вого пути́** аҡ юл теләү

**ПОЖЕЛТЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое һарғайған; **пожелте́лые ли́стья** һарғайған япраҡтар

**ПОЖЕЛТЕ́ТЬ** *сов.* һарғайыу; **ли́стья уже́ пожелте́ли** япраҡтар һарғайҙы инде

**ПОЖЕНИ́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* өйләндереү

**ПОЖЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* өйләнешеү

**ПОЖЕ́РТВОВАНИЕ** *с* ярҙам, иғәнә; **сбор поже́ртвований** иғәнә йыйыу

**ПОЖЕ́РТВОВАТЬ** *сов. см.* **же́ртвовать**

**ПОЖЕ́ЧЬ** *сов. что* **1.** (*сжечь всё*, *многое*) яндырып (көйҙөрөп) бөтөрөү; **поже́чь бума́ги** ҡағыҙҙарҙы яндырып бөтөрөү; **за́суха пожгла́ хлеба́** ҡорлоҡ ашлыҡтарҙы көйҙөрөп бөтөрҙө **2.** *без доп.*; *разг.* (*жечь некоторое время*) әҙерәк (бер аҙ) яндырыу

**ПОЖИ́ВА** *ж*; *разг.* еңел табыш, файҙа

**ПОЖИВА́ТЬ** *несов.* йәшәү, ғүмер итеү (кисереү), көн итеү (күреү); **как пожива́ете?** нисек йәшәйһегеҙ?

**ПОЖИВИ́ТЬСЯ** *сов. чем* и *без доп.*; *разг.* табыш (файҙа) итеү, байлыҡ йыйыу (табыу); **поживи́ться за счёт друго́го** башҡа кеше иҫәбенә байлыҡ йыйыу

**ПОЖИ́ЗНЕННЫЙ,** -ая, -ое ғүмерлек; **пожи́зненная пе́нсия** ғүмерлек пенсия

**ПОЖИЛО́Й,** -ая, -ое оло (өлкән) йәштәге; **пожило́й челове́к** оло йәштәге кеше

**ПОЖИМА́ТЬ** *несов. см.* **пожа́ть** I

**ПОЖИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пожа́ться** **2.** *страд. от* **пожима́ть**

**ПОЖИНА́ТЬ** *несов. см.* **пожа́ть** II 2; **пожина́ть плоды́** изгелеген күреү ♦ **пожина́ть ла́вры** дан ҡаҙаныу

**ПОЖИРА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* ҡомһоҙланып ашау (*хайуанға ҡарата*) **2.** *что*; *перен.*, *разг.* (*поглощать много чего-л.*) йотоп (алып, тотоп) бөтөрөү **3.** *что*; *перен.* (*уничтожать — об огне, пламени*) ялмап (солғап) алыу ♦ **пожира́ть глаза́ми** *кого-что* күҙ менән ашарҙай булып ҡарау

**ПОЖИ́ТКИ** *только мн.*; *разг.* ваҡ-төйәк мөлкәт

**ПОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** ғүмер итеү, тороу, көн күреү, йәшәү; **он пожи́л у нас два дня** ул беҙҙә ике көн торҙо **2.** *разг.* (*насладиться жизнью*) рәхәт йәшәү (тороу), донъяның рәхәтен күреү

**ПОЖРА́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **пожира́ть** 1, 2; **2.** *что, чего* и *без доп.*; *груб.*, *прост.* ашап алыу, ашау

**ПОЖУРИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* орошоп (шелтәләп) алыу

**ПО́ЗА** *ж* **1.** торош, ҡиәфәт, һын; **вели́чественная по́за** мөһабәт һын; **приня́ть небре́жную по́зу** илтифатһыҙ торош алыу **2.** *перен.* (*притворство*) ҡылансыҡлыҡ, ҡыланыу; **он не те́рпит по́зы** ул ҡыланыуҙы яратмай ♦ **стать в по́зу** (иғтибар итерлек) торош алыу

**ПОЗАБА́ВИТЬ** *сов. кого-что* әҙерәк (бер аҙ) күңелен күтәреү (асыу), бер аҙ албырғатыу; **позаба́вить дете́й** балаларҙы бер аҙ албырғатыу

**ПОЗАБА́ВИТЬСЯ** *сов.* (бер аҙ) күңел күтәреп (асып) алыу

**ПОЗАБО́ТИТЬСЯ** *сов. см.* **забо́титься** 1

**ПОЗАБЫВА́ТЬ I** *несов.*; *уст.*, *прост. см.* **позабы́ть**

**ПОЗАБЫВА́ТЬ II** *несов. кого-что*; *разг.* иҫтән (хәтерҙән) сығара барыу, онотоп бөтөп барыу; **позабыва́ть всех друзе́й** бөтә дуҫтарҙы онотоп бөтөп барыу

**ПОЗАБЫ́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **забы́ть**

**ПОЗАВИ́ДОВАТЬ** *сов. кому-чему* ҡыҙығыу, күҙ ҡыҙыу, көнләшеү

**ПОЗА́ВТРАКАТЬ** *сов. см.* **за́втракать**

**ПОЗАВЧЕРА́** *нареч.* элеккегөн, өсөнсө көн

**ПОЗАВЧЕРА́ШНИЙ,** -яя, -ее элеккегөнгө, өсөнсө көнгө; **позавчера́шний разгово́р** элеккегөнгө һөйләшеү

**ПОЗАГОРА́ТЬ** *сов.* бер аҙ ҡояшҡа яныу

**ПОЗАДИ́** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* артта; **сиде́ть позади́** артта ултырыу **2.** *предлог с род. п.* артта, артында, артынан; **е́хать позади́ всех** бөтәһенән дә артта барыу

**ПОЗАИ́МСТВОВАТЬ** *сов. что* **1.** (*перенять*) алыу, үҙләштереү; **позаи́мствовать спо́соб рабо́ты** эш ысулын үҙләштереү **2.** *разг.* (*взять в долг*) бурысҡа (көтөргә, үтескә) алыу

**ПОЗАНИМА́ТЬСЯ** *сов.* (әҙерәк) шөғөлләнеп (эшләп) алыу

**ПОЗАПРО́ШЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* өсөнсө, элеккенән; **позапро́шлый год** өсөнсө йыл

**ПОЗВА́ТЬ** *сов. см.* **звать** 1; **позва́ть друзе́й в го́сти** дуҫтарҙы ҡунаҡҡа саҡырыу

**ПОЗВЕНЕ́ТЬ** *сов.* ҡыңғырап (сыңғырлап, сыңлап) тороу; **колоко́льчик позвене́л и смолк** бәләкәй ҡыңғырау сыңғырлап торҙо ла тынды

**ПОЗВОЛЕ́НИЕ** *с* рөхсәт, ризалыҡ; **получи́ть позволе́ние** рөхсәт алыу; **уе́хать без позволе́ния** рөхсәтһеҙ китеү ♦ **с ва́шего позволе́ния** *в знач. вводн. сл.* һеҙҙең рөхсәтегеҙ менән; **с позволе́ния сказа́ть** *вводн. сл.*: 1) улай тип әйтергә яраһа; 2) ташҡа үлсәйем

**ПОЗВОЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое юл ҡуйылырлыҡ, рөхсәт итерлек, риза булырлыҡ

**ПОЗВО́ЛИТЬ** *сов.* **1.** *что* и *с неопр.* (*разрешить*) рөхсәт итеү, юл ҡуйыу; **позво́льте мне прийти́** миңә килергә рөхсәт итегеҙ **2.** *что* и *с неопр.* (*дать возможность*) мөмкинлек биреү; **боле́знь не позво́лила ему́ вы́йти и́з дому** ауырыуы уға өйҙән сығырға мөмкинлек бирмәне **3.** *повел.* **позво́ль(те)** рөхсәт ит(егеҙ)

**ПОЗВОЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **позво́лить**

**ПОЗВОНИ́ТЬ** *сов. см.* **звони́ть**

**ПОЗВОНО́К** *м*; *анат.* умыртҡа, умыртҡа һөйәге; **ше́йные позвонки́** муйын умыртҡалары

**ПОЗВОНО́ЧНИК** *м* умыртҡалыҡ, арҡа һөйәге

**ПОЗВОНО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** умыртҡа ...ы; **позвоно́чный столб** умыртҡа бағанаһы **2.** умыртҡалы; **позвоно́чные живо́тные** умыртҡалы хайуандар **3.** *в знач. сущ.* **позвоно́чные** *мн.*; *зоол.* умыртҡалылар

**ПОЗДНЕ́ЙШИЙ,** -ая, -ее иң һуңғы; **поздне́йшие достиже́ния** иң һуңғы ҡаҙаныштар

**ПО́ЗДНИЙ,** -яя, -ее **1.** һуң, һуңға ҡалған, һуңғы, ҡара; **по́здняя о́сень** ҡара көҙ **2.** (*запоздалый*) һуңлаған, һуңлап килгән; **по́здний гость** һуңға ҡалған ҡунаҡ; **по́здняя любо́вь** һуңлап килгән һөйөү **3.** һуң өлгөргән, һуң өлгөрөшлө; **по́здние сорта́ я́блок** алманың һуң өлгөргән сорттары ♦ **са́мое по́зднее** иң һуң тигәндә

**ПО́ЗДНО** **1.** *нареч.* һуң, һуңға ҡалып; **лечь по́здно** һуң ятыу **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* **уже́ по́здно** һуң инде; **бы́ло по́здно** һуң ине; **лу́чше**

**по́здно, чем никогда́** һуң булһа ла, эшләгән яҡшы

**ПОЗДОРО́ВАТЬСЯ** *сов. см.* **здоро́ваться**

**ПОЗДОРОВЕ́ТЬ** *сов.* һауығыу, сәләмәтләнеү, һауығып (сәләмәтләнеп) китеү

**ПОЗДОРО́ВИТЬСЯ: не поздоро́вится** *кому* яҡшы булмаҫ, башынан һыйпамаҫтар

**ПОЗДРАВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡотлау ...ы, тәбрикләү ...ы; **поздрави́тельная телегра́мма** ҡотлау телеграммаһы

**ПОЗДРА́ВИТЬ** *сов. кого-что, с чем* ҡотлау, тәбрикләү; **поздра́вить с пра́здником** байрам менән ҡотлау; **поздра́вить с прие́здом** килеү менән ҡотлау

**ПОЗДРАВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **поздра́вить — поздравля́ть 2.** ҡотлау, тәбрикләү, ҡотлау һүҙе (ҡағыҙы); **посла́ть поздравле́ние с днём рожде́ния** тыуған көн менән ҡотлау ебәреү; **принима́ть поздравле́ния** ҡотлауҙар ҡабул итеү

**ПОЗДРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **поздра́вить**

**ПОЗЕВА́ТЬ** *сов.* иҫнәү, иҫнәп алыу

**ПОЗЁВЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* әленән-әле иҫнәп алыу, ара-тирә иҫнәп ҡуйыу

**ПОЗЕЛЕНЕ́ТЬ** *сов. см.* **зелене́ть** 1, 3; **луга́ позелене́ли** болондар йәшәргән; **позелене́ть от зло́сти** асыуҙан күгәренеү; **медь позелене́ла** баҡыр йәшелләнеп бөткән

**ПОЗЕЛЕНИ́ТЬ** *сов. см.* **зелени́ть**

**ПОЗЕМЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ер (биләү) ...ы; **поземе́льный нало́г** ер һалымы; **поземе́льная ре́нта** ер рентаһы

**ПОЗЁМКА** *ж* и **ПОЗЁМОК** *м* йәйәүле буран

**ПОЗЁР** *м* и **ПОЗЁРКА** *ж*; *неодобр.* ҡуҡыр, ҡылансыҡ

**ПОЗЁРСТВО** *с*; *неодобр.* ҡуҡырлыҡ, ҡылансыҡлыҡ; **скло́нность к позёрству** ҡылансыҡлыҡҡа әүәҫлек

**ПО́ЗЖЕ** *сравн. ст. от* **по́здно** 1 һуңыраҡ, һуңға табанраҡ; **он пришёл по́зже меня́** ул минән һуңыраҡ килде

**ПОЗИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** бер ҡиәфәттә тороу, бер ҡиәфәт алыу (*һүрәт йәки һын яһаусыға*) **2.** ҡуҡырланыу, ҡыланыу

**ПОЗИТИ́В** *м*; *фото.* позитив

**ПОЗИТИВИ́ЗМ** *м*; *филос.* позитивизм (*идеалистик фәлсәфә йүнәлеше*)

**ПОЗИТИВИ́СТ** *м*; *филос.* позитивист

**ПОЗИТИВИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое позитивизм ...ы, позитивист ...ы; **позитиви́стские взгля́ды** позитивизм ҡараштары

**ПОЗИТИ́ВНЫЙ I,** -ая, -ое позитив; **позити́вное изображе́ние** позитив һүрәт

**ПОЗИТИ́ВНЫЙ II,** -ая, -ое **1.** фактарға (тәжрибәгә) нигеҙләнгән, позитив; **позити́вная програ́мма** тәжрибәгә нигеҙләнгән программа **2.** *книжн.* (*положительный*) ыңғай, позитив; **позити́вное сужде́ние** ыңғай фекер йөрөтөү

**ПОЗИТРО́Н** *м*; *физ.* позитрон

**ПОЗИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *воен.* позиция ...ы; **позицио́нная война́** позиция һуғышы (*ике яҡтан да нығытылған позициянан тороп һуғышыу*)

**ПОЗИ́ЦИЯ** *ж* **1.** позиция, (торған) урын, торош; **вы́годная пози́ция** уңай позиция **2.** (*место расположения войск в бою*) позиция, урын; **артиллери́йская пози́ция** артиллерия позицияһы; **передовы́е пози́ции** алғы позициялар; **отпра́виться на пози́ции** позицияларға китеү **3.** *перен.* позиция, ҡараш, мөнәсәбәт; **отста́ивать свою́ пози́цию** үҙ ҡарашыңды яҡлау **4.** *муз.*, *спорт.* позиция, торош; **си́льная пози́ция ладьи́ в ша́хматной па́ртии** шахмат партияһында ладьяның көслө позицияһы

**ПОЗЛИ́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* үсектереү, асыуын килтереү, асыуландырыу

**ПОЗЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* асыуланып тороу (йөрөү)

**ПОЗЛОРА́ДСТВОВАТЬ** *сов.* үсәшеп тороу (йөрөү)

**ПОЗЛОСЛО́ВИТЬ** *сов.* яманлап һөйләп алыу, артынан яманлау

**ПОЗНАВА́ЕМОСТЬ** *ж*; *книжн.* танып булырлыҡ, танып беленеү, танып белерлек булыу; **познава́емость ми́ра** донъяның танып беленеүе

**ПОЗНАВА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **познава́ть 2.** *прил.*; *книжн.* таныуға булған, танып белерлек (беленә торған); **мир познава́ем** донъя танып белерлек

**ПОЗНАВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое танып белеү ...ы; **познава́тельный проце́сс** танып белеү процесы

**ПОЗНАВА́ТЬ** *несов. см.* **позна́ть**

**ПОЗНАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** беленеү, танылыу; **друзья́ познаю́тся в беде́** дуҫтар бәләгә тарығанда таныла **2.** *страд. от* **познава́ть**

**ПОЗНАКО́МИТЬ** *сов. см.* **знако́мить**

**ПОЗНАКО́МИТЬСЯ** *сов. см.* **знако́миться**

**ПОЗНА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **позна́ть 2.** *мн.* **позна́ния** белем, мәғлүмәт; **у него́ больши́е позна́ния в медици́не** уның медицинала мәғлүмәте ҙур

**ПОЗНА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*постичь*) танып белеү; **позна́ть су́щность явле́ний** күренештәрҙең асылын танып белеү; **позна́ть и́стину** хәҡиҡәтте танып белеү **2.** *кого-что* (*получить представление о ком-чём-л.*) белеү, белеп еткереү, төшөнөү, аңлау; **позна́ть жизнь** тормошто аңлау **3.** *что* (*испытать*) кисереү, татыу, баштан үткәреү; **позна́ть ра́дость труда́** хеҙмәт ҡыуанысын татыу; **позна́ть го́речь разлу́ки** айырылып тороуҙың әсеһен татыу

**ПОЗОЛО́ТА** *ж* ялатылған (йүгертелгән) алтын (*берәй нәмәгә*); **позоло́та часо́в стёрлась** сәғәттең ялатылған алтыны ҡырылып бөткән

**ПОЗОЛОТИ́ТЬ** *сов. см.* **золоти́ть**; **позолоти́ть ра́му** ҡыҫанға алтын ялатыу

**ПОЗОЛО́ТЧИК** *м* алтынлаусы, алтын ялатыусы

**ПОЗОЛО́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **позолоти́ть 2.** *прил.* алтынланған, алтын ялатылған; **позоло́ченные ло́жки** алтын ялатылған ҡалаҡтар

**ПОЗО́Р** *м* оят, хурлыҡ, мәсхәрә, рисуайлыҡ; **клейми́ть позо́ром** хурлыҡ тамғаһы һалыу; **покры́ть себя́ позо́ром** оятҡа ҡалыу; **не перенести́ позо́ра** мәсхәрәгә түҙеп тора алмау

**ПОЗО́РИТЬ** *несов. кого-что* хурлау, мәсхәрәләү, оятҡа ҡалдырыу, хурлыҡҡа төшөрөү; **позо́рить до́брое и́мя** *чьё-л. кемдеңдер* яҡшы исемен мәсхәрәләү

**ПОЗО́РИТЬСЯ** *несов.* **1.** мәсхәрә булыу, оятҡа (хурлыҡҡа) ҡалыу **2.** *страд. от* **позо́рить**

**ПОЗО́РИЩЕ** *с*; *разг.* хурлыҡ, мәсхәрә, хурлыҡлы күренеш

**ПОЗО́РНЫЙ,** -ая, -ое хурлыҡлы, мәсхәрәле; **позо́рный посту́пок** хурлыҡлы ҡылыҡ; **позо́рная тру́сость** хурлыҡлы ҡурҡаҡлыҡ; **позо́рный слу́чай** мәсхәрәле хәл

**ПОЗУМЕ́НТ** *м* уҡа; **бе́лый позуме́нт** аҡ уҡа; **сере́бряный позуме́нт** көмөш уҡа

**ПОЗУМЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** уҡа ...ы; **позуме́нтная мастерска́я** уҡа оҫтаханаһы; **позуме́нтный ма́стер** уҡа оҫтаһы **2.** (*сделанный с позументом*) уҡалы, уҡалау; **позуме́нтный по́яс** уҡалы билбау; **позуме́нтная обши́вка на зна́мени** байраҡты уҡалау

**ПОЗЫ́В** *м* теләү, -ғы/-ге килеү; **позы́в ко сну** йоҡлағы килеү

**ПОЗЫВА́ТЬ** *несов. кого-что безл.* теләү, килеү; **его́ позыва́ет поспа́ть** уның йоҡоһо килә

**ПОЗЫВНО́Й,** -ая, -ое **1.** саҡырыу ...ы; **позывно́й сигна́л** саҡырыу сигналы **2.** *в знач. сущ.* **позывны́е** *мн.* танытыу сигналдары

**ПОИГРА́ТЬ** *сов.* уйнап алыу, әҙерәк (бер аҙ) уйнау; **поигра́ть с детьми́** балалар менән уйнап алыу

**ПОИ́ГРЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* уйнағылау, уйнап алыу; **пои́грывать на балала́йке** балалайкала уйнағылау

**ПОИЗДЕВА́ТЬСЯ** *сов. над кем-чем* (бер аҙ) мәсхәрәләп (хурлап) алыу

**ПОИЗДЕРЖА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тотоноп (туҙҙырып) бөтөрөү (*күп кенә аҡсаны*)

**ПОИЗМЫВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*бер аҙ*) мәсхәрәләп (хурлап) алыу

**ПОИЗНОСИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* туҙҙырып (иҫкертеп) бөтөрөү; **поизноси́ть боти́нки** ботинканы туҙҙырып бөтөрөү

**ПОИЗНОСИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туҙып (иҫкереп) бөтөү

**ПОИ́ЛЕЦ-КОРМИ́ЛЕЦ** *м* и **ПОИ́ЛИЦА-КОРМИ́ЛИЦА** *ж*; *уст.*, *трад.-поэт.* ашатыусы-эсереүсе

**ПОИ́ЛКА** *ж* һыу эсергес; **автомати́ческая пои́лка** автоматик һыу эсергес

**ПОИМЁННО** *нареч.* исемләп, исемен атап; **назва́ть всех поимённо** барыһын да исемләп әйтеү

**ПОИМЁННЫЙ,** -ая, -ое исемләп, исемдәре атап төҙөлгән; **поимённый спи́сок** исемдәре атап төҙөлгән исемлек; **поимённое голосова́ние** исемләп тауышҡа ҡуйыу

**ПОИМЕНОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *офиц.* исемдәрен атап сығыу; **поименова́ть свиде́телей** шаһиттарҙың исемдәрен атап сығыу

**ПОИ́МКА** *ж* **1.** *см.* **пойма́ть**; **пои́мка лиси́ц** төлкө тотоу; **пои́мка граби́телей** талаусыларҙы тотоу

**ПОИМУ́ЩЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое *офиц.* милек ...ы, мөлкәт ...ы; **поиму́щественный нало́г** милек һалымы

**ПОИНТЕРЕСОВА́ТЬСЯ** *сов. кем-чем* ҡыҙыҡһыныу, ҡыҙыҡһыныу белдереү, белге килеү, белергә ынтылыу; **поинтересова́ться успе́хами сы́на** улыңдың уңыштары менән ҡыҙыҡһыныу

**ПО́ИСК** *м* **1.** *в разн. знач.* эҙләнеүҙәр, эҙләү; **по́иски неприя́теля** дошманды эҙләү; **отпра́виться на по́иски** эҙләүгә сығып китеү; **по́иски ре́дкой кни́ги** һирәк осрай торған китап эҙләү; **геологи́ческие по́иски** геологик эҙләнеүҙәр; **нау́чный по́иск** ғилми эҙләнеү; **тво́рческий по́иск в иску́сстве** сәнғәттә ижади эҙләнеү **2.** *воен.* эҙләү, разведка; **ночно́й по́иск** төнгө эҙләү

**ПОИСКА́ТЬ** *сов. кого-что* эҙләп ҡарау, эҙләштереү; **поиска́ть ну́жную кни́гу** кәрәкле китапты эҙләп ҡарау

**ПО́ИСКОВЫЙ** и **ПОИСКО́ВЫЙ,** -ая, -ое эҙләнеү ...ы, эҙләү ...ы; **поиско́вая па́ртия** *геол.* (мәғдән) эҙләү партияһы; **по́исковые рабо́ты** эҙләнеү эштәре; **поиско́вые войска́** эҙләү ғәскәрҙәре

**ПОИ́СТИНЕ** *нареч.* ысынында, ысынлап, ысын мәғәнәһендә; **э́то пои́стине прекра́сное произведе́ние** был ысын мәғәнәһендә шәп әҫәр

**ПОИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого*, *чем* эсереү, һуғарыу; **пои́ть чае́м** сәй эсереү; **пои́ть лошаде́й** аттарҙы һуғарыу **2.** *кого*, *чем*; *разг.* (*давать пить вино, спиртные напитки*) эсереү, һыйлау **3.** *что*, *чем*; *перен.* һуғарыу, туйындырыу; **ту́чи по́ят зе́млю дождём** болоттар ерҙе ямғыр менән һуғара ♦ **пои́ть-корми́ть** ашатып-эсереү, аҫрау, ҡарау

**ПО́ЙЛО** *с* ашлы һыу

**ПО́ЙМА** *ж* һыубаҫар (һыу баҫа торған) туғай (ер, урын)

**ПОЙМА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тотоу, эләктереү, тотоп (эләктереп) алыу; **пойма́ть мя́ч** тупты тотоп алыу; **пойма́ть пти́цу** ҡош тотоу; **пойма́ть во́ра** уғрыны тотоу **2.** *кого*; *перен.* (*изобличить*) тотоу ♦ **пойма́ть на у́дочку** *см.* **у́дочка**

**ПО́ЙМЕННЫЙ,** -ая, -ое һыубаҫар туғай ...ы, һыу баҫа торған, һыубаҫар; **по́йменные по́чвы** һыубаҫар туғай ере; **по́йменное се́но** һыубаҫар туғай бесәне

**ПО́ЙНТЕР** *м* (*порода собак*) пойнтер (*эт тоҡомо*)

**ПОЙТИ́** *сов.* **1.** барыу, китеү, китеп барыу; **пойти́ в лес** урманға барыу; **он попроща́лся и пошёл** ул хушлашты ла китеп барҙы **2.** (*о механизмах*) йөрөп (ҡуҙғалып) китеү; **часы́ пошли́** сәғәт йөрөп китте **3.** сыға башлау, аға башлау; **из трубы́ пошёл дым** мөрйәнән төтөн сыға башланы; **из ра́ны пошла́ кровь** яранан ҡан аға башланы **4.** (*об осадках*) яуа башлау; **пошёл дождь** ямғыр яуа башланы **5.** китеү, үтеү; **да́льше доро́га пошла́ ле́сом** артабан юл урман эсләтеп китте **6.** (*поддаться на приманку*) ҡабыу, эләгеү; **на таки́х черве́й ры́ба пойдёт** бындай селәүсенгә балыҡ ҡабыр **7.** (*поступить куда-л.*) уҡырға инеү; **он пошёл в институ́т** ул институтҡа уҡырға инде **8.** (*найти сбыт*) үтеү, үтә башлау; **това́р пошёл хорошо́** тауар яҡшы үтә башланы **9.** (*предназначаться, израсходоваться*) китеү, кәрәк булыу; **на хала́т пошло́ мно́го шёлка** халатҡа күп ебәк китте **10.** (*оказаться подходящим*) барыу, килешеү; **э́то пла́тье пошло́ бы вам** был күлдәк һеҙгә килешер ине **11.** ҡуйыла башлау, күрһәтелә башлау; **сего́дня пойдёт но́вая карти́на** бөгөн яңы картина ҡуйыла башлай **12.** барыу, инеү; **э́тот гвоздь не пойдёт в сте́ну** был ҡаҙау стенаға бармаҫ **13.** *в прош. вр.* **пошёл**, **пошла́**, **пошли́** *разг.* (*в знач. "уходи", "уйди"*) кит; **пошёл вон!** кит бынан! ♦ **(пойти́) по ли́нии наиме́ньшего сопротивле́ния** *см.* **наиме́ньший**; **пошла́ потёха** *см.* **потёха**; **пойти́ по́ миру** *см.* **мир**; **пошла́ писа́ть губе́рния** *см.* **губе́рния**; **далеко́ пойти́** *см.* **далеко́**

**ПОКА́** *нареч.*, *союз* и *частица* **1.** *нареч.* әлегә, хәҙер(гә), әле; **он пока́ у́чится** ул әле уҡый; **пока́ ничего́ не изве́стно** әлегә бер ни ҙә билдәле түгел; **побу́дь пока́ здесь** әлегә ошонда тороп тор **2.** *союз временной* (*в то время как*) -ғанда/-гәндә, -ған/-гән саҡта (сағында); **пока́ он у́чится, на́до ему́ помо́чь** уҡыған саҡта уға ярҙам итергә кәрәк **3.** *союз временной* (*до того времени как*) -ғансы/-гәнсе, -ғанға/-гәнгә тиклем; **жди здесь, пока́ я не приду́** мин килгәнсе, ошонда көтөп тор **4.** *частица*; *прост.* (*до свидания*) хәҙергә хуш; **ну, пока́!** ярай, хәҙергә хуш! ♦ **пока́ что** хәҙергә

**ПОКА́З** *м см.* **показа́ть** 1, 2

**ПОКАЗА́НИЕ** *с* **1.** күрһәтмә, күрһәтеү, һөйләү; **расхожде́ния в показа́ниях исто́чников** сығанаҡтар күрһәтмәләрендәге айырмалыҡтар **2.** (алынған, бирелгән) мәғлүмәт, яуап; **дава́ть показа́ния суду́** судҡа мәғлүмәт биреү; **пи́сьменные показа́ния подсуди́мого** ғәйепләнеүсенән алынған яҙма мәғлүмәттәр **3.** күрһәтеү; **показа́ние термоме́тра** термометрҙың күрһәтеүе

**ПОКАЗА́ТЕЛЬ** *м*; *в разн. знач.* күрһәткес; **показа́тели культу́рного ро́ста** мәҙәниәт үҫешенең күрһәткестәре; **показа́тель сте́пени** *мат.* дәрәжә күрһәткесе

**ПОКАЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*типичный*) күренекле, ғибрәт алырлыҡ, ғибрәтле; **показа́тельные явле́ния** ғибрәт алырлыҡ күренештәр **2.** (*организованный для ознакомления*) күрһәтмә; **показа́тельный суд** күрһәтмә суд **3.** (*образцовый*) үрнәк, үрнәк (булырлыҡ); **показа́тельное хозя́йство** үрнәк хужалыҡ

**ПОКАЗА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, на кого-что*; *в разн. знач.* күрһәтеү; **показа́ть спекта́кль** спектакль күрһәтеү; **показа́ть больно́го врачу́** ауырыуҙы табипҡа күрһәтеү; **показа́ть, как по́льзоваться ко́мпасом** компас менән нисек файҙаланырға кәрәклекте күрһәтеү; **показа́ть графи́чески рост производи́тельности труда́** хеҙмәт етештереүсәнлеге үҫешен график менән күрһәтеү; **часы́ показа́ли по́лночь** сәғәт төн уртаһын күрһәтте **2.** *кого-что* күрһәтеү, танытыу; **показа́ть себя́ хоро́шим рабо́тником** үҙеңде яҡшы хеҙмәткәр итеп күрһәтеү **3.** *с союзом "что"* күрһәтеү; **свиде́тель показа́л, что зна́ет обвиня́емого** шаһит ғәйепләнеүсене белгәнлеген күрһәтте **4.** (*проучить*) күрһәтеү, уҡытыу, иманын уҡытыу; **я ему́ покажу́!** күрһәтермен әле мин уға! ♦ **не показа́ть ви́ду** тышҡа сығармау, белдермәү; **показа́ть (свой) ко́гти** *см.* **ко́готь**; **показа́ть ку́зькину мать** *см.* **ку́зькин**; **показа́ть ку́киш в карма́не** *см.* **ку́киш**; **показа́ть нос** *куда*, *где* күренеү, килеп сығыу (*берәй ергә*); **показа́ть приме́р** үрнәк күрһәтеү; **пока́зать пя́тки** *см.* **пя́тка**; **показа́ть на дверь** *кому* ҡыуып сығарыу

**ПОКАЗА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*представиться каким-л.*, *чем-л.*) күренеү, тойолоу; **день ожида́ния показа́лся мне го́дом** көткән саҡта көн йыл булып тойолдо **2.** (*появиться*) күренеү, пәйҙә булыу; **вдали́ показа́лось селе́ние** йыраҡта ауыл күренде; **из-за гор показа́лось со́лнце** тауҙар артынан ҡояш күренде **3.** (*явиться*) күренеү; (*для осмотра*) ҡаралыу; **показа́ться врачу́** табипҡа күренеү ♦ **не́бо с овчи́нку (в овчи́нку) показа́лось** *см.* **не́бо**

**ПОКАЗНО́Й,** -ая, -ое **1.** күрһәтә торған, күрһәтеүгә арналған; **показно́й това́р** күрһәтә торған тауар **2.** яһалма, күҙ буяу өсөн булған; **показны́е слёзы** яһалма күҙ йәше (*юрамал илау*)

**ПОКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **показа́ть** 1—3

**ПОКА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **показа́ться** 2, 3; **2.** *страд. от* **пока́зывать**

**ПОКАЛЕ́ЧИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* имгәтеү, ғәриплəндереү

**ПОКАЛЕ́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* имгәнеү, ғәрипләнеү

**ПОКА́ЛЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* сәнсеү, сәнсеп ауыртыу, сәнсеп-сәнсеп алыу; **у меня́ в боку́ пока́лывает** *безл.* ҡабырғам сәнсештерә

**ПОКАРА́ТЬ** *сов. см.* **кара́ть**

**ПОКАРАУ́ЛИТЬ** *сов. кого-что* и *без доп.*; *разг.* ҡарауыллап (ҡарап) тороу; **покарау́лить ве́щи** әйберҙәрҙе ҡарап тороу

**ПОКАТА́ТЬ** *сов. кого-что* йөрөтөү, йөрөтөп килтереү; **поката́ть дете́й на маши́не** балаларҙы машинала йөрөтөп килтереү

**ПОКАТА́ТЬСЯ** *сов.* йөрөп килеү (алыу), ултырып йөрөү, шыуып алыу; **поката́ться на ло́дке** кәмәгә ултырып йөрөү; **поката́ться на лы́жах** саңғыла шыуып алыу

**ПОКАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тәгәр(л)әтеү, тумарлатыу, тәгәр(л)әтеп (тумарлатып) алып китеү; **покати́ть бревно́** бүрәнә тәгәр(л)әтеү; **покати́ть бо́чку к маши́не** мискәне машинаға табан тәгәр(л)әтеү **2.** *разг.* (*быстро поехать*) китеп барыу; **он покати́л в го́род** ул ҡалаға китеп барҙы

**ПОКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тәгәр(л)әп (тумарлап) китеү; **мяч покати́лся** туп тәгәр(л)әп китте **2.** тәгәр(л)әп (шыуып) төшөү; **покати́ться с горы́** тауҙан тәгәр(л)әп төшөү ♦ **покати́ться со́ смеху** тәгәрәп көлөү, эс ҡатып көлөү

**ПОКА́ТЫЙ,** -ая, -ое һөҙәк, һарҡыу, иңкеү; **пока́тая кры́ша** һөҙәк ҡыйыҡ; **пока́тые пле́чи** иңкеү яурын

**ПОКАЧА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* бәүетеү, тирбәтеү; **покача́ть ребёнка** баланы бәүетеү **2.** *чем* һелкеү, сайҡау; **покача́ть голово́й** баш һелкеү **3.** *что* (бер аҙ) һурҙырыу; **покача́ть во́ду** бер аҙ һыу һурҙырыу

**ПОКАЧА́ТЬСЯ** *сов.* бәүелеү, тирбәлеү; **покача́ться на каче́лях** бәүелсәктә бәүелеү; **часово́й ма́ятник покача́лся и останови́лся** сәғәт теле тирбәлде лә туҡтап ҡалды

**ПОКА́ЧИВАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* бәүетеңкерәү, тирбәтеңкерәү, бәүеткеләү, тирбәткеләү, сәңгелдәтеү; **пока́чивать ребёнка** баланы тирбәтеңкерәү **2.** *чем* һелккеләү, һелкеңкерәү, сайҡаңҡырау; **пока́чивать голово́й** баш һелккеләү

**ПОКА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** (*слегка качаться*) бәүелеңкерәү, тирбәлеңкерәү **2.** (*при ходьбе*) аушанлау, аушан-таушан килеү, ауа-түнә барыу (килеү); **идти́ пока́чиваясь** аушан-таушан китеп барыу

**ПОКАЧНУ́ТЬ** *сов. что* һелкетеп (тирбәтеп, ҡыбырлатып) ҡуйыу

**ПОКАЧНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** сайҡалып (бәүелеп) китеү; **гимна́ст покачну́лся** гимнаст сайҡалып китте **2.** *разг.* (*накрениться*) ҡыйшайыу, аушайыу; **избу́шка си́льно покачну́лась** өй ныҡ аушайған

**ПОКА́ШЛИВАТЬ** *несов.* йүткерештереү, йүтәлләштереү, йүткергеләү

**ПОКА́ШЛЯТЬ** *сов.* йүткереп ҡуйыу, йүтәлләп алыу

**ПОКАЯ́НИЕ** *с* тәүбә; **приноси́ть покая́ние** тәүбә итеү, тәүбәгә килеү

**ПОКАЯ́ННЫЙ,** -ая, -ое тәүбә ...ы, тәүбә итеү ...ы; **покая́нные слова́** тәүбә һүҙҙәре; **покая́нное письмо́** тәүбә хаты

**ПОКА́ЯТЬСЯ** *сов. см.* **ка́яться**

**ПОКВИТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** *с чем* (*отдать долг сполна*) иҫәпләшеү, иҫәпте өҙөү **2.** *с кем* (*отомстить*) иҫәпләшеү, үс алыу

**ПО́КЕР** *м* покер (*кәрт уйыны төрө*); **игра́ть в по́кер** покер уйнау

**ПОКИВА́ТЬ** *сов.* һелкеп (һелккеләп) ҡуйыу

**ПОКИДА́ТЬ I** *сов.*; *разг.* ырғытҡылау, бырағтырып (ташлап) бөтөрөү, атып бәреү, теләһә ҡайҙа ташлау

**ПОКИДА́ТЬ II** *несов. см.* **поки́нуть**

**ПОКИ́НУТЬ** *сов. кого-что* **1.** ташлап (ҡалдырып) китеү; **поки́нуть го́род** ҡаланы ташлап китеү; **поки́нуть дете́й** балаларҙы ташлап китеү; **поки́нуть слу́жбу** эш урынын ҡалдырып китеү **2.** *перен.* китеү, ҡайтыу; **си́лы поки́нули его́** уның ҡарыуы ҡайтты; **его́ поки́нуло сча́стье** уның ҡото китте ♦ **поки́нуть на произво́л судьбы́** *см.* **произво́л**

**ПОКИПЕ́ТЬ** *сов.* ҡайнаңҡырау, ҡайнай биреү

**ПОКИПЯТИ́ТЬ** *сов. что* ҡайнатыңҡырау, ҡайната биреү; **покипяти́ть молоко́** һөттө ҡайната биреү

**ПОКЛАДА́ТЬ: рук не поклада́ть** *уст.* арымай-талмай, ҡул ҡаушырмай, бер туҡтамай; **не поклада́я рук** тырышып

**ПОКЛА́ДИСТЫЙ,** -ая, -ое ыҡҡа килеүсән, һүҙ тыңлаусан, күндәм; **покла́дистый хара́ктер** күндәм холоҡ

**ПОКЛА́ЖА** *ж*; *разг.* йөк, һалыҡ; **тяжёлая покла́жа** ауыр йөк

**ПОКЛЕВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*склевать всё*) сүпләп (суҡып) бөтөрөү; **ку́ры поклева́ли про́со** тауыҡтар тарыны сүпләп бөтөрҙө **2.** *что*, *чего* (*склевать немного*) сүпләштереү, (бер аҙ) сүпләү; **поклева́ть зёрен** ашлыҡ сүпләштереү **3.** *что* и *без доп.* (*о рыбе*) сирткеләү, сirtештереү **4.** *чего*; *разг.* (*поесть немного — о человеке*) аҙ-маҙ генә ашау, ҡапҡылау, семтештереү; **за за́втраком поклева́л пирожка́** иртән аҙ-маҙ бөйөрөк кенә ашаны

**ПОКЛЁП** *м*; *разг.* яла; **возвести́ поклёп** *на кого-л. берәйһенә* яла яғыу

**ПОКЛО́Н** *м* **1.** баш эйеү (*ололап*, *иҫәнләшеп*, *рәхмәт белдереп һ.б.*) **2.** сәләм; **переда́ть покло́н** сәләм ебәреү ♦ **идти́ на покло́н (с покло́ном)** барып баш эйеү, ялынып һорау

**ПОКЛОНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **поклоня́ться 2.** баш эйеү, табыныу; **поклоне́ние тала́нту писа́теля** яҙыусының талантына баш эйеү

**ПОКЛОНИ́ТЬСЯ** *сов. кому-чему* **1.** *см.* **кла́няться** 1, 2; **2.** *перен.* (*попросить*, *унижаясь*) ялынып (үтенеп) һорау, ялыныу, үтенеү

**ПОКЛО́ННИК** *м* и **ПОКЛО́ННИЦА** *ж* **1.** (*почитатель*, *почитательница*) табыныусы,

хөрмәтләүсе, баш эйеүсе; **он покло́нник Пу́шкина** ул Пушкинға табыныусы **2.** (*влюблённый, влюблённая*) яратыусы (ғашиҡ) кеше

**ПОКЛОНЯ́ТЬСЯ** *несов. кому-чему* **1.** табыныу; **поклоня́ться язы́ческим бога́м** мәжүси аллаларға табыныу **2.** баш эйеү, табыныу, һоҡланыу; **поклоня́ться тала́нту худо́жника** рәссамдың талантына баш эйеү

**ПОКЛЯ́СТЬСЯ** *сов. см.* **кля́сться**; **покля́сться отомсти́ть** үс алырға ант итеү; **покля́сться в ве́рности** тоғролоҡҡа ант итеү

**ПОКО́ИТЬСЯ** *несов.* **1.** *на чём* ултырыу, ятыу; **зда́ние поко́ится на ка́менном фунда́менте** йорт таш нигеҙҙә ултыра **2.** *высок.* (*быть похороненным*) (ҡәбере, һөйәге) ятыу

**ПОКО́Й** *м* **1.** тын, тынлыҡ, тыныслыҡ; **над о́зером цари́т поко́й** күл өҫтө тын **2.** (*спокойное физическое и душевное состояние*) тыныслыҡ, тынғы, маҙа; **больно́му ну́жен поко́й** ауырыуға тыныслыҡ кәрәк; **не находи́ть поко́я** тынғы таппау; **не дава́ть поко́я** тынғы бирмәү ♦ **ве́чный поко́й** мәңге тынлыҡ, үлем; **приёмный поко́й** ҡабул итеү бүлмәһе (*хәстәханаға ятырға килгән ауырыуҙы ҡарап ҡабул итеү өсөн*); **удали́ться на поко́й** ҡартайып, ялға сығыу; эштән бушаныу; **пора́ идти́ на поко́й** йоҡларға ятырға ваҡыт

**ПОКО́ЙНИК** *м* и **ПОКО́ЙНИЦА** *ж* **1.** (*труп*) үлек, мәйет **2.** (*упоминание о покойнике*) мәрхүм, мәрхүмә

**ПОКО́ЙНИЦКАЯ** *ж* мәйетхана (*хәстәхана эргәһендә*)

**ПОКО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тыныс; **поко́йный сон** тыныс йоҡо; **поко́йная ста́рость** тыныс ҡартлыҡ; **2.** (*умерший*) үлгән, мәрхүм **3.** *в знач. сущ.* **поко́йный** *м* мәрхүм, **поко́йная** *ж* мәрхүмә; **почти́ть па́мять поко́йного** мәрхүмде хөрмәтләп иҫкә алыу ♦ **поко́йной но́чи** тыныс йоҡо

**ПОКОЛЕБА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*покачать*) тирбәлтеү, тирбәлдереү; **ве́тер поколеба́л верху́шки дере́вьев** ел ағастарҙың башын тирбәлтте **2.** (*подорвать*) ҡаҡшатыу; **поколеба́ть авторите́т** *чей-л. кемдеңдер* абруйын ҡаҡшатыу **3.** *кого* (*вызвать сомнение*) шөбһәләндереү, шикләндереү, шиккә (шөбһәгә) төшөрөү

**ПОКОЛЕБА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тирбәлеп (сайҡалып) тороу **2.** ҡаҡшау; **его́ авторите́т поколеба́лся** уның абруйы ҡаҡшаны **3.** икеләнеү, икеләнеп тороу; **поколеба́ться в вы́боре специа́льности** һөнәр һайлағанда икеләнеп тороу

**ПОКОЛЕ́НИЕ** *с*; *в разн. знач.* быуын; **молодо́е поколе́ние** йәш быуын; **тре́тье поколе́ние** өсөнсө быуын ♦ **из поколе́ния в поколе́ние**: 1) (*по наследству*) нәҫелдән нәҫелгә; 2) (*по традиции*) быуындан быуынға

**ПОКОЛОТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, по чему, во что* и *без доп.*; *разг.* бәреү, һуғыу **2.** *кого* (*побить*) дөмбәҫләү, биргеләү **3.** *что*; *прост.* (*разбить всё, многое*) сайратып бөтөрөү; **поколоти́ть стёкла** быялаларҙы сайратып бөтөрөү

**ПОКО́НЧИТЬ** *сов.* **1.** *что, с чем* (*завершить*) бөтөрөү, тамамлау, теүәлләү; **поко́нчить с зада́нием** эште тамамлау; **поко́нчить с дела́ми** эштәрҙе бөтөрөү **2.** *с кем-чем* (*прекратить что-л.*) бөтөрөү, юҡ итеү; **поко́нчить с безрабо́тицей** эшһеҙлекте бөтөрөү; **поко́нчить с враго́м** дошманды юҡ итеү ♦ **поко́нчить счёты** *см.* **счёт**; **поко́нчить с собо́й (с жи́знью)** үҙен-үҙе үлтереү, үҙенә ҡул һалыу

**ПОКОПА́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* ҡаҙа (соҡой) биреү

**ПОКОПА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡаҙыныу, соҡоноу

**ПОКОРЕ́НИЕ** *с см.* **покори́ть** — **покоря́ть**; **покоре́ние высоты́** бейеклек яулау

**ПОКОРИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПОКОРИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* буйһондороусы, баш эйҙереүсе ♦ **покори́тель серде́ц** *шутл.* һөймәлекле ир-егет (*ҡатын-ҡыҙҙар өсөн*)

**ПОКОРИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*завоевать*) яулап алыу, буйһондороу, бағындырыу; **покори́ть кре́пость** ҡәлғәне яулап алыу **2.** (*заставить повиноваться*) буйһондороу; **покори́ть си́лы приро́ды** тәбиғәт көстәрен буйһондороу **3.** (*очаровать*) үҙенә ҡаратыу ♦ **покори́ть се́рдце** үҙеңде һөйҙөрөп, күңелен биләү

**ПОКОРИ́ТЬСЯ** *сов. кому-чему* и *без доп.* буйһоноу, бағыныу, баш эйеү; **покори́ться судьбе́** яҙмышҡа буйһоноу

**ПОКОРМИ́ТЬ** *сов. кого-что* ашатыу, ашатып алыу; **покорми́ть ребёнка** баланы ашатып алыу

**ПОКОРМИ́ТЬСЯ** *сов. чем* и *без доп.*; *разг.* ашау, ашап алыу

**ПОКО́РНОСТЬ** *ж* буйһоноусанлыҡ, тыңлаусанлыҡ, күндәмлек; **прояви́ть поко́рность** күндәмлек күрһәтеү

**ПОКО́РНЫЙ,** -ая, -ое буйһоноусан, тыңлаусан, күндәм ♦ **ваш поко́рный слуга́** *уст.* беҙ фәкирегеҙ

**ПОКОРО́БИТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡалтайтыу, салшайтыу; **пол покоро́било** *безл.* иҙән ҡалтайған **2.** *кого*; *разг.* ерәндереү, ерәнес тыуҙырыу, сикәндереү, ытырғандырыу; **его́ покоро́било от э́тих слов** *безл.* был һүҙҙәр уны ытырғандырҙы

**ПОКОРО́БИТЬСЯ** *сов. см.* **коро́биться**; **дверь от сы́рости покоро́билась** дымдан ишек ҡалтайған

**ПОКОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **покори́ть**

**ПОКОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **покори́ться** **2.** *страд. от* **покоря́ть**

**ПОКО́С** *м* **1.** (*косьба*) бесән сабыу **2.** (*время косьбы*) бесән өҫтө, бесән ваҡыты **3.** (*место косьбы*) сабын, сабынлыҡ

**ПОКОСИ́ТЬ I** *сов.*; *разг.* **1.** *что* (*скосить, выкосить*) сабыу, сабып алыу (бөтөү); **покоси́ть луга́** болондарҙы сабып бөтөү **2.** *что* и *без доп.* (*некоторое время*) бер аҙ сабыу

**ПОКОСИ́ТЬ II** *сов.* **1.** *что* ҡыйшайтыу, салшайтыу; **око́нную ра́му покоси́ло** *безл.* тәҙрә ҡыҫаны ҡыйшайған **2.** *что, чем* (*посмотреть искоса*) ҡырын ҡарау

**ПОКОСИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **коси́ться** 1, 2; **ра́ма покоси́лась** ҡыҫан салшайған **2.** (*косо посмотреть*) ҡырын ҡарау

**ПОКРА́ПАТЬ** *сов.* һибәләү, һибәләп алыу (ҡуйыу); **дождь покра́пал** ямғыр һибәләп алды

**ПОКРА́ПЫВАТЬ** *несов.* һибәләү, һибәләп тороу

**ПОКРА́СИТЬ** *сов.* **1.** *что*; *разг.* буяу, буяп сығыу (ҡуйыу) **2.** *что* и *без доп.* (*красить некоторое время*) буяп алыу

**ПОКРА́СКА** *ж*; *разг., спец. см.* **покра́сить** 1; **покра́ска двере́й** ишектәрҙе буяу

**ПОКРАСНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **покрасне́ть 2.** (*место*) ҡыҙарған урын; **покрасне́ния на ко́же** тиреләге ҡыҙарған урындар

**ПОКРАСНЕ́ТЬ** *сов. см.* **красне́ть** 1, 2; **ви́шня покрасне́ла** сейә ҡыҙарған; **покрасне́ть от стыда́** оялыштан ҡыҙарып китеү

**ПОКРАСОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡупшыланыу, ҡупшыланып китеү (йөрөү)

**ПОКРАХМА́ЛИТЬ** *сов.* *что* крахмаллап алыу; **покрахма́лить бельё** кер крахмаллап алыу

**ПОКРИВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡыйшайтыу, салшайтыу; **покриви́ть рот** ауыҙ ҡыйшайтыу **2.** *разг.* (*поступить против совести, сказав неправду*) ялғанлау, ялған һөйләү

**ПОКРИВИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡыйшайыу, салшайыу; **забо́р покриви́лся** ҡойма ҡыйшайып киткән

**ПОКРИ́КИВАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** ҡысҡырғылау **2.** (*бранить*) аҡырыныу, екеренеү

**ПОКРИТИКОВА́ТЬ** *сов.* *кого-что*; *разг.* тәнҡитләү, тәнҡитләп алыу

**ПОКРО́В** *м* **1.** *чего, какой* япма; **сне́жный покро́в** ҡар япмаһы; **расти́тельный покро́в** үҫемлек япмаһы **2.** (*оболочка, покрывающая организм*) ҡатлам, тыш, көп; **ко́жный покро́в** тире ҡатламы; **нару́жный покро́в се́мени** орлоҡтоң тышы ♦ **волосяно́й покро́в** төк (йөн) ҡапламы; **под покро́вом** *чего нимәлер* ҡиәфәтендә (рәүешендә); **снять покро́в (покро́вы)** *с чего ниҙелер* асыҡлау, *ниҙеңдер* ысын йөҙөн күрһәтеү

**ПОКРОВИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПОКРОВИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* ҡурсалаусы, ҡурғаусы, яҡлаусы

**ПОКРОВИ́ТЕЛЬСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое ҡурсалай (ҡурғай) торған; **покрови́тельственный вид** ҡурсалай торған ҡиәфәт ♦ **покрови́тельственная окра́ска (фо́рма)** *биол.* ҡурсалау төҫө (формаһы) (*ҡайһы бер хайуандарҙың һәм үҫемлектәрҙең тышҡы күренеше һәм төҫө менән башҡа хайуандарға, үҫемлектәргә йәки тирәләге тәбиғәткә оҡшауы*)

**ПОКРОВИ́ТЕЛЬСТВО** *с* ҡурсалау, яҡлау, ҡурғаусылыҡ

**ПОКРОВИ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов. кому-чему* ҡурсалау, яҡлау, ҡурғау, ҡанат аҫтына алыу

**ПОКРО́Й** *м* өлгө, бесем; **мо́дный покро́й пла́тья** күлдәктең модалы өлгөһө ♦ **на оди́н покро́й**; **одного́ покро́я** *кто-что* бер ҡалыптан сыҡҡандай, бер ҡалыпҡа һуғылған (*кешегә, нәмәгә ҡарата*)

**ПОКРОПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*слегка окропить*) бөрккөләү, әҙерәк бөркөү **2.** (*о дожде*) һибәләй башлау

**ПОКРОШИ́ТЬ** *сов.* *что, чего* турау, тураҡлау; **покроши́ть хлеб** икмәк тураҡлау

**ПОКРУЖИ́ТЬ** *сов.* *кого-что* и *без доп.* әйләндереп тороу, уралтып (тирәләй) әйләнеү

**ПОКРУЖИ́ТЬСЯ** *сов.* уралтып (тирәләй) әйләнеү

**ПОКРУТИ́ТЬ** *сов.* *что, кем-чем* и *без доп.* әйләндереү, борғолау; **покрути́ть голово́й** башты борғолау; **покрути́ть вещь в рука́х** әйберҙе ҡулда әйләндереү

**ПОКРУТИ́ТЬСЯ** *сов.* әйләнеү, өйрөлөү

**ПОКРЫВА́ЛО** *с* **1.** япма, йәймә, ябыу; **покрыва́ло для посте́ли** түшәк ябыуы **2.** (*род женской одежды*) ябыу, ябыулыҡ; **заку́таться в покрыва́ло** ябыулыҡҡа бөркәнеү

**ПОКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **покры́ть**

**ПОКРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **покры́ться 2.** *страд. от* **покрыва́ть**

**ПОКРЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ябыу, йәйеү, ҡаплау; **покры́ть стол ска́тертью** өҫтәлгә ашъяулыҡ йәйеү; **покры́ть ребёнка одея́лом** балаға юрған ябыу **2.** *что* (*сделать крышу над чем-л.*) ябыу; **покры́ть дом желе́зом** өйҙө тимер менән ябыу **3.** *что* (*обить*) көпләү, ҡаплау, тышлау; **покры́ть сунду́к желе́зом** һандыҡты тимер менән көпләү; **покры́ть шу́бу сукно́м** буҫтау менән тун тышлау **4.** *что* ҡаплау, ябыу; **снег покры́л зе́млю** ер өҫтөн ҡар ҡапланы; **ту́чи покры́ли не́бо** күк йөҙөн болоттар ҡапланы **5.** *что* (*возместить что-л. истраченное*) ҡаплау, түләп бөтөрөү; **покры́ть расхо́ды** сығымдарҙы ҡаплау **6.** *что* (*заглушить — о звуках*) баҫыу, баҫып (күмеп) китеү; **го́лос ора́тора покры́л шум** һөйләүсенең тауышы шау-шыуҙы баҫты **7.** *кого-что* (*скрыть*) баҫырыу, йәшереү; **покры́ть преступле́ние** енәйәтте баҫырыу; **покры́ть соо́бщников** енәйәттәштәрҙе йәшереп ҡалыу **8.** *что* (*преодолеть какое-л. расстояние*) үтеү **9.** *что*; *карт.* баҫыу, ябыу; **покры́ть вале́т тузо́м** туз менән валетты ябыу **10.** *кого*; *спец.* (*оплодотворить*) ҡаплатыу, ҡасыртыу, тороҡтороу ♦ **покры́ть позо́ром** *кого-что* хурлыҡҡа төшөрөү; **покры́ть сла́вой** *кого-что* данға күмеү; **покры́то та́йной** *что* сер итеү; **покры́то мра́ком неизве́стности** *см.* **мрак**

**ПОКРЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ябыныу, бөркәнеү; **покры́ться одея́лом** юрған ябыныу; **покры́ться ша́лью** шәл бөркәнеү **2.** ҡапланыу, күмелеү; **по-**

**ля́ покры́лись сне́гом** яландар ҡар менән ҡапланды **3.** (*заглушиться — о звуках*) ҡапланыу, баҫылып ҡалыу **4.** (*возместиться*) ҡапланыу

**ПОКРЫ́ШКА** *ж* **1.** *прост. см.* **покры́ть** 1; **2.** *разг.* (*крышка*) ҡапҡас, япҡыс **3.** покрышка; **автомоби́льная покры́шка** автомобиль покрышкаһы; **покры́шка футбо́льного мяча́** футбол тубының покрышкаһы

**ПОКУПА́ТЕЛЬ** *м* и **ПОКУПА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* һатып алыусы

**ПОКУПА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һатып алыу ...ы; **покупа́тельная спосо́бность населе́ния** халыҡтың һатып алыу һәләте

**ПОКУПА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое һатып алыусы(лар) ...ы; **покупа́тельская конфере́нция** һатып алыусылар конференцияһы

**ПОКУПА́ТЬ** *несов. кого-что*; *в разн. знач.* һатып алыу

**ПОКУ́ПКА** *ж* **1.** *см.* **покупа́ть** **2.** (*купленная вещь*) һатып алынған әйбер; **дешёвая поку́пка** арзанға һатып алынған әйбер

**ПОКУПНО́Й,** -ая, -ое **1.** һатып алыу ...ы; **покупна́я цена́ земли́** ерҙең һатып алыу хаҡы **2.** (*купленный*) һатып алынған; **покупно́й хлеб** һатып алынған икмәк **3.** *см.* **покупа́тельный**

**ПОКУ́РИВАТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *разг.* тәмәке тартыу (тартҡылау)

**ПОКУРИ́ТЬ** *сов. что*, *чего* и *без доп.* тәмәке тартыу (тартып алыу); **покури́ть табачку́** тәмәке тартып алыу

**ПОКУСА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** тешләү, тешләп-тешләп алыу; **покуса́ть гу́бы** ирендәрҙе тешләү **2.** тешләү; (*о пчёлах*) сағыу, сағып сығыу (бөтөү)

**ПОКУСИ́ТЬСЯ** *сов. на что* и *с неопр.* (*попытаться что-л. сделать*) -ға/-гә ынтылыу (уйлап ҡарау, хасланыу, ҡул һуҙыу (һуҙып ҡарау)); **покуси́ться на чужо́е иму́щество** кеше милкенә ҡул һуҙыу

**ПОКУ́СЫВАТЬ** *несов. кого-что* **1.** тешләштереү, тешләгеләү; **поку́сывать гу́бы** ирендәрҙе тешләгеләү **2.** (*о пчёлах, крапиве и т.п.*) сағыу, саҡҡылау

**ПОКУ́ШАТЬ** *сов. что*, *чего* и *без доп.* ашау, ашап алыу

**ПОКУША́ТЬСЯ** *несов. см.* **покуси́ться**

**ПОКУШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **покуси́ться — покуша́ться** **2.** (*попытка убить*) үлтермәксе булыу, үлтерергә итеү

**ПОЛ I** *м* иҙән; **деревя́нный пол** ағас иҙән

**ПОЛ II** *м* енес, зат ♦ **же́нский пол** *см.* **же́нский**; **прекра́сный (сла́бый, не́жный) пол** *шутл.* ҡатын-ҡыҙ заты; **си́льный пол** *шутл.* ир-ат заты

**ПОЛ...** и **ПОЛ-...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ярты", "ярым" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **полдере́вни** ярты ауыл; **пол-я́блока** ярты алма; **полжи́зни** ярты ғүмер; **на полпути́** ярты юлда; **полвторо́го** икенсе ярты; **пол-оборо́та** ярым әйләнеш (боролош)

**ПОЛА́** *ж* **1.** (*пальто, пиджака и т.п.*) сабыу, салғый; **пра́вая пола́** уң салғый **2.** (*край навешенного полотнища*) итәк; **пола́ пала́тки** сатырҙың итәге ♦ **из-под полы́** ҡуйындан, итәк аҫтынан (*йәшереп*)

**ПОЛАГА́ТЬ** *несов.* (*думать*) уйлау, иҫәп тотоу, тип уйлау (белеү, һанау, иҫәпләү); **полага́ть вы́полнить рабо́ту к сро́ку** эште ваҡытына үтәргә иҫәп тотоу

**ПОЛАГА́ТЬСЯ I** *несов.* (*быть установленным*) ярау, тейеш (ярашлы) булыу; **так полага́ется** шулай булырға тейеш; **кури́ть не полага́ется** тәмәке тартырға ярамай

**ПОЛАГА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **положи́ться** **2.** *страд. от* **полага́ть**

**ПОЛА́ДИТЬ** *сов. с кем* и *без доп.* килешеү, ярашыу, һыйышыу; **мы с ним всегда́ пола́дим** беҙ уның менән һәр ваҡыт килешербеҙ; **не пола́дить ме́жду собо́й** үҙ-ара һыйыша алмау

**ПОЛА́КОМИТЬСЯ** *сов.* татлы һыйланыу, тәм-татҡа һыйланып алыу

**ПОЛА́ТИ** *только мн.* һәндерә

**ПО́ЛБА** *ж* борай

**ПОЛБЕДЫ́** *в знач. сказ.*; *разг.* әллә ни ҙур бәлә түгел, бигүк насар түгел; **э́то ещё полбеды́** уныһы әллә ни ҙур бәлә түгел

**ПО́ЛДЕНЬ** *м* төш, өйлә, төш ваҡыты, көн үҙәге (уртаһы); **до полу́дня** өйләгә (төшкә) тиклем

**ПОЛДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое төшкө, төш (өйлә) ваҡытындағы, көн үҙәгендәге (уртаһындағы); **полдне́вный зной** көн үҙәгендәге эҫелек

**ПО́ЛДНИК** *м* **1.** (*еда*) икенде ашы **2.** (*время такого приёма пищи*) икенде

**ПО́ЛДНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* икенде ашын ашау

**ПОЛДНЯ́** *м* ярты көн

**ПО́ЛЕ** *с* **1.** ялан; **идти́ по́лем** яландан барыу **2.** (*засеянный участок земли*) баҫыу, ҡыр; **па́хотное по́ле** һөрөүгә яраҡлы баҫыу; **пшени́чное по́ле** бойҙай баҫыуы; **о́пытное по́ле** тәжрибә баҫыуы **3.** (*специально оборудованная площадка*) майҙан; **лётное по́ле** осоу майҙаны; **футбо́льное по́ле** футбол майҙаны **4.** *перен.* (*область деятельности*) өлкә; **обши́рное по́ле деятельности** киң эшмәкәрлек өлкәһе **5.** (*основа, фон*) ерлек; **си́тец с голубы́ми поля́ми** күк ерлекле ситса сит **6.** *обычно мн.* **поля́**; *в разн. знач.* тирәс, сит; **оставля́ть поля́ в тетра́ди** дәфтәр битенең ситен яҙмай ҡалдырыу; **шля́па с широ́кими поля́ми** киң тирәсле эшләпә **7.** *спец.* (*изыскания в природных условиях*) ялан; **рабо́тать в усло́виях по́ля** ялан шарттарында эшләү **8.** *физ.* майҙан, ҡыр; **электри́ческое по́ле** электр ҡыры ♦ **по́ле бо́я**; **по́ле бра́ни** *высок.* һуғыш майҙаны; **по́ле зре́ния** *см.* **зре́ние**; **ищи́ ве́тра в по́ле** *см.* **ве́тер**

**ПОЛЕВИ́ЦА** *ж* ҡондораҡ (*ҡыяҡ үлән*)

**ПОЛЁВКА** *ж* ҡыр сысҡаны

**ПОЛЕВО́Д** *м* баҫыусы (*баҫыу эштәре белгесе*)

**ПОЛЕВО́ДСТВО** *с* баҫыусылыҡ

**ПОЛЕВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое баҫыусылыҡ ...ы; **полево́дческие брига́ды** баҫыусылыҡ бригадалары

**ПОЛЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** ялан ...ы; **полева́я доро́га** ялан юлы; **полевы́е цветы́** ялан сәскәләре **2.** баҫыу ...ы; **полевы́е рабо́ты** баҫыу эштәре **3.** (*походный*) ялан ...ы, поход ...ы; **полево́й суд** ялан суды; **полево́й го́спиталь** ялан госпитале; **полева́я ку́хня** поход кухняһы; **полева́я по́чта** ялан почтаһы ♦ **полева́я су́мка** ҡыр сумкаһы (*бил ҡайышына тағып йөрөтөлә*); **полево́й шпат** ҡыр шпаты (*силикаттар төркөмөнән булған минерал*)

**ПОЛЕГА́НИЕ** *с*; *с.-х.* йығылыу; **предохране́ние пшени́цы от полега́ния** бойҙайҙы йығылыуҙан һаҡлау

**ПОЛЕГА́ТЬ** *несов. см.* **поле́чь** 2, 3

**ПОЛЕГО́НЬКУ** *нареч.*; *разг.* әкрен генә, яйлап ҡына, иплэп кенә

**ПОЛЕЖА́ТЬ** *сов.* ятып алыу, ята биреү; **полежа́ть в посте́ли** түшәктә ята биреү

**ПОЛЁЖИВАТЬ** *несов.*; *разг.* ятып тороу, ятҡылау

**ПОЛЕЗАЩИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое баҫыу һаҡлау ...ы, ҡыр һаҡлау ...ы; **полезащи́тные лесонасажде́ния** баҫыу һаҡлау урмандары

**ПОЛЕ́ЗНОСТЬ** *ж* файҙалылыҡ; **поле́зность лека́рства** дарыуҙың файҙалылығы

**ПОЛЕ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** файҙалы; **поле́зные начина́ния** файҙалы башланғыстар; **поле́зная кни́га** файҙалы китап; **поле́зная пи́ща** файҙалы аҙыҡ **2.** (*пригодный для определённой цели*) файҙалы, файҙаланыуға яраҡлы; **поле́зная пло́щадь** файҙаланыуға яраҡлы майҙан; **коэффицие́нт поле́зного де́йствия** файҙалы эш коэффициенты ♦ **поле́зные ископа́емые** файҙалы ҡаҙылмалар (ҡаҙылдыҡтар)

**ПОЛЕ́ЗТЬ** *сов.* **1.** (*начать лезть*) менә башлау, менеп китеү; **поле́зть на де́рево** ағасҡа менеп китеү **2.** ҡул тығыу, тығылыу; **поле́зть в портфе́ль за карандашо́м** ҡәләм эҙләп портфелгә тығылыу **3.** *прост.* (*начать делать что-л.*) тотоноу, керешеү; **поле́зть в дра́ку** һуғышырға тотоноу

**ПОЛЕМИЗИ́РОВАТЬ** *несов. с кем* и *без доп.* һүҙ көрәштереү, бәхәсләшеү

**ПОЛЕ́МИКА** *ж* бәхәс, полемика, һүҙ көрәштереү

**ПОЛЕМИ́СТ** *м* и **ПОЛЕМИ́СТКА** *ж* бәхәссе, полемикасы

**ПОЛЕМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*заключающий в себе полемику*) бәхәсле, полемикалы; **полеми́ческая статья́** бәхәсле мәҡәлә; **полеми́ческое выступле́ние** бәхәсле сығыш **2.** (*страстный*) полемик, һүҙ көрәштереүгә хас; **полеми́ческий тон** полемик тон

**ПОЛЕМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **полеми́ческий**

**ПОЛЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* ялҡауланыу, иренеү

**ПОЛЕ́ННИЦА** *ж* әрҙәнә; **сложи́ть поле́нницу** әрҙәнә өйөү

**ПОЛЕ́НО** *с* утын ағасы

**ПОЛЕ́СЬЕ** *с* шар, һаҙлы әрәмәлек, һаҙлы урман

**ПОЛЁТ** *м* **1.** осоу, осош; **полёт пти́цы** ҡош осоуы; **полёт снаря́да** снаряд осоуы; **косми́ческий полёт** йыһанға осоу **2.** *перен.* осош; **полёт мы́сли** уйҙар осошо ♦ **пти́ца высо́кого полёта** ҙур (түрә) кеше; **с высоты́ пти́чьего полёта** бик юғарынан

**ПОЛЕТА́ТЬ** *сов.* осоу, осоп алыу

**ПОЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** осоп китеү; **пти́ца полете́ла** ҡош осоп китте **2.** (*на самолёте*) осоу; **он полети́т в Москву́** ул Мәскәүгә оса **3.** *разг.* (*упасть*) осоп (йығылып, ҡолап) төшөү, ҡолап (йығылып) китеү **4.** (*помчаться*) осоп (елеп) барыу **5.** (*о времени*) бик тиҙ үтеү (үтеп китеү, тороу)

**ПОЛЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** (*быть убитым — о всех, многих*) ятып (үлеп) ҡалыу **2.** (*о растениях*) йығылыу, ятыу; **по́сле ли́вня пшени́ца полегла́** ҡойма ямғырҙан һуң бойҙай йығылды **3.** *разг.* ятыу, ятып бөтөү; **де́ти полегли́ спать** балалар йоҡларға ятты

**ПО́ЛЗАТЬ** *несов.* **1.** шыуышыу, үрмәләү, шыуышып (үрмәләп, имгәкләп) йөрөү; (*о ребёнке*) имгәкләү; **насеко́мые по́лзают** бөжәктәр үрмәләп йөрөй **2.** *разг.* әкрен барыу (хәрәкәтләнеү, йөҙөү, йөрөү һ.б.); **ту́чи по́лзали по не́бу** күк йөҙөндә болоттар әкрен йөҙәләр **3.** *перен.*, *разг.* (*унижаться*) табан ялау ♦ **по́лзать в нога́х** *у кого* аяғына йығылыу, алдына йөгөнөү, йөгөнөкләү; **по́лзать на брю́хе** *см.* **брю́хо**

**ПОЛЗКО́М** *нареч.* шыуышып, үрмәләп; **продвига́ться ползко́м** шыуышып барыу

**ПОЛЗТИ́** *несов.* **1.** шыуышыу, үрмәләү, шыуышып (үрмәләп, имгәкләп) барыу (килеү); (*о ребёнке*) имгәкләү; **ползти́ на́ гору** тауға үрмәләү; **змея́ ползёт** йылан шыуыша **2.** *разг.* (*медленно передвигаться*) әкрен барыу (хәрәкәтләнеү, йөрөү һ.б.); **по́езд е́ле ползёт** поезд бик әкрен бара **3.** (*о растениях*) үрмәләү, үрмәләп үҫеү; **по забо́ру ползёт плющ** ҡоймаға һырлауыҡ үрмәләй **4.** (*о негромких, нерезких звуках, о слухах и т.п.*) йөрөү, таралыу **5.** (*оползать*) ишелеү; **бе́рег реки́ ползёт** йылға яры ишелә **6.** (*о дороге, тропинке*) һуҙылып (һыҙылып) ятыу **7.** *разг.* (*расползаться от ветхости — о ткани*) ылбырау, шытылыу, һыпылыу

**ПОЛЗУ́Н** *м* **1.** *разг.* (*о детях*) шыуышҡан бала **2.** *тех.* шыуҙырма (*машинаның шыуып йөрөмәле өлөшө*)

**ПОЛЗУНО́К** *м* **1.** *см.* **ползу́н** 1; **2.** *мн.* **ползунки́**; *разг.* ползунок (*бәләкәй бала кейеме*)

**ПОЛЗУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** (*о животных*) һөйрәлеүсе, шыуышыусы **2.** (*стелющийся*) үрмәле; **ползу́чие расте́ния** үрмәле үҫемлектәр **3.** (*о дыме, тумане и т.п.*) шыуышыусы

**ПОЛИ...** *кушма һүҙҙәрҙең "күп", "төрлө" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **полиартри́т** быуындар һыҙлауы; **поливитами́ны** төрлө витаминдар

**ПОЛИА́НДРИЯ** *ж*; *книжн.* полиандрия, күп ирлелек

**ПОЛИ́В** *м см.* **поли́ть — полива́ть** 1; **иску́сственный поли́в** яһалма һуғарыу; **поли́в сельскохозя́йственных культу́р** ауыл хужалығы культураларын һуғарыу

**ПОЛИВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **полить** 1; **2.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* һиптереү, сәсеү; **полива́ть из пулемёта** пулемёттан һиптереү; **полива́ть све́том фар** фараларҙан яҡтылыҡ сәсеү

**ПОЛИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **поли́ться** 1; **2.** *страд. от* **полива́ть**

**ПОЛИ́ВКА** *ж см.* **поли́ть — полива́ть** 1; **поли́вка гряд** түтәлдәргә һыу һибеү

**ПОЛИВНО́Й,** -ая, -ое **1.** һуғарыу ...ы; **поливно́й сезо́н** һуғарыу миҙгеле; **поливна́я маши́на** һуғарыу машинаһы **2.** *в разн. знач.* һуғарыла торған, һуғарылмалы; **поливны́е зе́мли** һуғарылмалы ерҙәр; **поливно́е земледе́лие** һуғарыла торған ер эшкәртеү эштәре

**ПОЛИ́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое һуғарыу ...ы; **поли́вочные рабо́ты** һуғарыу эштәре; **поли́вочная маши́на** һуғарыу машинаһы

**ПОЛИГА́МИЯ** *ж*; *книжн.* полигамия (*күп ирле йәки күп ҡатынлы булыу*)

**ПОЛИГИНИ́Я** *ж*; *книжн.* полигиния (*күп ҡатын алыу*)

**ПОЛИГЛО́Т** *м* полиглот (*күп тел белгән кеше*)

**ПОЛИГО́Н** *м* полигон (*атыуға өйрәнеү йәки яңы ҡорал һынау урыны*)

**ПОЛИГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое полиграфия ...ы; **полиграфи́ческая промы́шленность** полиграфия сәнәғәте; **полиграфи́ческий комбина́т** полиграфия комбинаты

**ПОЛИГРАФИ́Я** и *уст.* **ПОЛИГРА́ФИЯ** *ж* полиграфия (*баҫма нәмәләр етештереүҙең бөтә төрөн үҙ эсенә алған техника тармағы*)

**ПОЛИКЛИ́НИКА** *ж* поликлиника; **де́тская поликли́ника** балалар поликлиникаһы

**ПОЛИМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое полимер; **полиме́рные вещества́** полимер матдәләр; **полиме́рные соедине́ния** полимер берләшмәләр; **полиме́рные материа́лы** полимер материалдар

**ПОЛИМЕ́РЫ** *мн.* (*ед.* **полиме́р** *м*); *физ.*, *хим.* полимерҙар; **приро́дные полиме́ры** тәбиғи полимерҙар (*каучук, целлюлоза, аҡһымдар, ыҫмала һ.б.*); **синтети́ческие полиме́ры** синтетик полимерҙар (*карбамид ыҫмалалар, полиэтилен, полистирол, полиэфирҙар һ.б.*)

**ПОЛИМОРФИ́ЗМ** *м* полиморфизм (**1.** *биол. бер үк төргә ҡараған хайуан йәки үҫемлектәр араһында бер-береһенән ҡырҡа айырыла торған формаларҙың булыуы* **2.** *хим. бер үк матдәнең төрлө формала кристаллаштырыуға һәләтлеге*); **полово́й полиморфи́зм** енси полиморфизм; **полиморфи́зм се́ры** көкөрттөң полиморфизмы

**ПОЛИНЯ́ЛЫЙ,** -ая, -ое уңған, төҫө киткән; **полиня́лая занаве́ска** төҫө киткән ҡорған

**ПОЛИНЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **линя́ть** 1; **2.** (*о животных*) ябағаһын (йөнөн) ҡойоу; (*о птицах*) төләү, төгөн һалыу; (*о пресмыкающихся*) ҡабыҡ (ҡау) һалыу, төләү

**ПОЛИОМИЕЛИ́Т** *м*; *мед.* полиомиелит (*арҡа мейеһенең шешеүе, күберәк балаларҙа*)

**ПОЛИ́П** *м* полип (**1.** *зоол. ҡуҙғалмай бер урында йәшәгән диңгеҙ хайуаны* **2.** *мед. лайлалы тиресәләге шеш*); **кора́лловый поли́п** мәрйен полибы; **пресново́дный поли́п** сөсө һыу полибы; **поли́пы желу́дка** ашҡаҙан полиптары

**ПОЛИРОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое полировкалау ...ы; **полирова́льная маши́на** полировкалау машинаһы

**ПОЛИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* от **полирова́ть** **2.** *прил.* полировкалы; **полиро́ванная ме́бель** полировкалы мебель; **полиро́ванный грани́т** полировкалы гранит

**ПОЛИРОВА́ТЬ** *несов. что* полировкалау; **полирова́ть ме́бель** мебель полировкалау

**ПОЛИРОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **полирова́ть**

**ПОЛИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **полирова́ть**; **полиро́вка посу́ды** һауыт полировкалау **2.** (*отполированная поверхность*) полировка; **полиро́вка стола́** өҫтәл полировкаһы

**ПОЛИРО́ВЩИК** *м* полировкалаусы

**ПО́ЛИС** *м* полис (*милекте, ғүмерҙе һ.б. страховкалау документы*)

**ПОЛИСМЕ́Н** *м* полисмен (*Англияла, АҠШта һәм ҡайһы бер башҡа илдәрҙә полиция хеҙмәткәре*)

**ПОЛИТ...** *кушма һүҙҙәрҙең "сәйәси" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **политрабо́та** сәйәси эш

**ПОЛИТБЮРО́** *с нескл.* (*политическое бюро*) политбюро

**ПОЛИТЕХНИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **политехнизи́ровать**

**ПОЛИТЕХНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* политехникалаштырыу, политехнизм индереү; **политехнизи́ровать шко́лу** мәктәпте политехникалаштырыу

**ПОЛИТЕХНИ́ЗМ** *м* политехнизм (*мәктәптә хеҙмәт тәрбиәһе биреү менән бергә, техника менән ғәмәлдә таныштырыу*)

**ПОЛИТЕ́ХНИКУМ** *м* политехникум (*урта техник белем бирә торған уҡыу йорто*)

**ПОЛИТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое политехник; **политехни́ческий институ́т** политехник институт; **политехни́ческое образова́ние** политехник белем

**ПОЛИ́ТИК** *м* сәйәсмән; **дальнови́дный поли́тик** алдан күреүсән сәйәсмән

**ПОЛИ́ТИКА** *ж* **1.** сәйәсәт; **вну́тренняя поли́тика** эске сәйәсәт; **торго́вая поли́тика** сауҙа сәйәсәте; **теку́щая поли́тика** ағымдағы сәйәсәт **2.** *разг.* ниәт, хәйлә; **знать поли́тику** *чью-л. кемдеңдер* хәйләһен белеү

**ПОЛИТИКА́Н** *м*; *презр.* политикан (*маҡсатына ирешеү өсөн бер саранан да тартынмаған принципһыҙ сәйәсмән*)

**ПОЛИТИКА́НСТВО** *с*; *презр.* политиканлыҡ

**ПОЛИ́ТИКО-ВОСПИТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сәйәси тәрбиә ...ы; **поли́тико-воспита́тельная рабо́та** сәйәси тәрбиә эше

**ПОЛИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* сәйәси; **полити́ческая де́ятельность** сәйәси эшмәкәрлек; **полити́ческий строй** сәйәси ҡоролош; **полити́ческое преступле́ние** сәйәси енәйәт; **полити́ческое движе́ние** сәйәси хәрәкәт ♦ **полити́ческая эконо́мия** сәйәси иҡтисад

**ПОЛИТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* уйлап эш иткән, үҙен-үҙе тота белгән, нескә уйланылған; **полити́чное обраще́ние** алдын-артын уйлап эш иткән мөғәмәлә; **полити́чный посту́пок** нескә уйланылған эш-ҡылыҡ

**ПОЛИТУ́РА** *ж* политура (*полировка өсөн спиртлы лак*)

**ПОЛИТУЧЁБА** *ж* (*политическая учёба*) сәйәси уҡыу, сәйәси белем алыу

**ПОЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һибеү, һыу һибеү (ҡойоу), һуғарыу; **поли́ть цветы́** гөлдәргә һыу һибеү; **поли́ть дере́вья в саду́** баҡсалағы ағастарға һыу һибеү **2.** *без доп.* (*начать лить*) яуа (ҡоя) башлау; **поли́л дождь** ямғыр ҡоя башланы

**ПОЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*полить себя*) ҡойоноу; **поли́ться холо́дной водо́й** һалҡын һыу менән ҡойоноу **2.** (*начать литься*) ағыу, ҡойолоу, ағып китеү; **из кра́на полила́сь вода́** һемәктән һыу ағып китте **3.** *перен.* (*начаться*) башланыу; **полила́сь задуше́вная бесе́да** ихлас һөйләшеү башланды

**ПОЛИТЭКОНО́МИЯ** *ж* (*политическая экономия*) политэкономия

**ПОЛИФОНИ́Я** и **ПОЛИФО́НИЯ** *ж*; *муз.* полифония, күп тауышлылыҡ

**ПОЛИЦЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое **1.** полиция ...ы; **полице́йское управле́ние** полиция идаралығы **2.** *в знач. сущ.* **полице́йский** *м* полицей

**ПОЛИ́ЦИЯ** *ж* полиция (**1.** *дәүләт тәртибен һаҡлау органы* **2.** *полицейҙарҙан торған төркөм*); **нало́говая поли́ция** һалым полицияһы

**ПОЛИЦМЕ́ЙСТЕР** *м* полицмейстер (*ҡайһы бер сит илдәрҙә эре ҡалалағы полиция башлығы*)

**ПОЛИ́ЧНОЕ: с поли́чным** енәйәт өҫтөндә; **пойма́ть с поли́чным** енәйәт өҫтөндә тотоу; **попа́сться с поли́чным** енәйәт өҫтөндә тотолоу

**ПОЛИШИНЕ́ЛЬ** *м* Полишинель (*француз халыҡ театрының мәрәкәсеһе*) ♦ **секре́т Полишине́ля** бөтәһенә күптән билдәле сер, буш сер

**ПОЛК** *м* **1.** *воен.* полк **2.** *кого*; *перен.*, *разг.* төркөм, көтөү; **полк проси́телей** һораусылар төркөмө ♦ **на́шего полку́ (в на́шем полку́) при́было** беҙҙең сафта кеше артты, арабыҙға берәү өҫтәлде

**ПО́ЛКА I** *ж* **1.** кәштә; **кни́жная по́лка** китап кәштәһе **2.** урын, полка (*вагонда*); **ни́жняя по́лка** аҫҡы урын

**ПО́ЛКА II** *ж см.* **поло́ть**; **по́лка сорняко́в** сүп үләнен утау

**ПОЛКО́ВНИК** *м* полковник

**ПОЛКОВО́ДЕЦ** *м* полководец, ғәскәр башлығы

**ПОЛКОВО́Й,** -ая, -ое *воен.* полк ...ы; **полково́е зна́мя** полк байрағы

**ПОЛНЕ́ТЬ** *несов.* йыуанайыу, ҡалынайыу; **бы́стро полне́ть** тиҙ йыуанайыу

**ПОЛНИ́ТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* йыуанайтыу, йыуан итеп күрһәтеү; **э́то пла́тье её полни́т** был күлдәк уны йыуан итеп күрһәтә

**ПО́ЛНИТЬСЯ** *несов.*; *книжн.* тулыу, таралыу; **наде́ждой по́лнится се́рдце** йөрәк өмөт менән тула ♦ **слу́хом земля́ по́лнится** хәбәр менән донъя тула

**ПО́ЛНО 1.** *нареч.* иркен, тулыраҡ; **жить так по́лно** шундай иркен йәшәү **2.** *в знач. сказ.*, *безл.*, *с неопр.*; *разг.* етер, етте, ҡуй(ығыҙ), ташла(ғыҙ); **по́лно пла́кать** етер, илама **3.** *частица* (*в значении "перестаньте"*) ярай, йә ярар, ярай инде; **по́лно, здесь все свои́** ярай, бында барыһы ла үҙебеҙҙекеләр

**ПОЛНО́** *нареч. в знач. числ.*; *разг.* туп-тулы, бик күп; **в до́ме полно́ наро́ду** өйҙә кеше туптулы ♦ **полны́м-полно́** бик күп, туп-тулы, бихисап

**ПОЛНО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "тулы" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **полновла́стие** тулы хакимиәтлек; **полноте́лый** тулы кәүҙәле

**ПОЛНОВЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тулы ауырлыҡтағы (ауырлыҡлы); **полнове́сная ги́ря** тулы ауырлыҡтағы гер **2.** *перен.*, *разг.* (*сильный*) ҡаты, көслө; **полнове́сный уда́р** ҡаты һуғыу

**ПОЛНОВЛА́СТНЫЙ,** -ая, -ое тулы хакимиәтле

**ПОЛНОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое тулы (мул) һыулы; **полново́дная река́** мул һыулы йылға

**ПОЛНОВО́ДЬЕ** *с* һыу муллығы, һыуға муллыҡ

**ПОЛНОГЛА́СИЕ** *с*; *лингв.* тулы һуҙынҡылыҡ (*боронғо славян телендәге "-ра-", "-ла-", "-ре-" урынына урыҫ, украин, белорус телдә-*

*рендә "-оро-", "-оло-", "-ере-" теҙмәһе килеү, мәҫ., "злато" — "золото", "град" — "город", "брег" — "берег")*

**ПОЛНОЗВУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тулы яңғырашлы; **полнозву́чный го́лос** тулы яңғырашлы тауыш

**ПОЛНОКРО́ВИЕ** *с*; *мед.* тулы ҡанлылыҡ, ҡан күплек

**ПОЛНОКРО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *мед.* тулы ҡанлы **2.** (*здоровый*) сәләмәт, көр күңелле **3.** *перен.* (*содержательный, насыщенный*) тулы ҡанлы, ваҡиғаларға бай; **полнокро́вная жизнь** ваҡиғаларға бай тормош

**ПОЛНОЛУ́НИЕ** *с* тулған ай (*айҙың тулған сағы*)

**ПОЛНОМЕТРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое тулы метражлы; **полнометра́жный фильм** тулы метражлы фильм

**ПОЛНОМО́ЧИЕ** *с* вәкәләт, вәкиллек хоҡуғы; **не превыша́ть свои́х полномо́чий** үҙенең вәкиллек хоҡуҡтарынан ситкә сыҡмау

**ПОЛНОМО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тулы хоҡуҡлы, тулы вәкәләтле; **полномо́чный представи́тель** тулы хоҡуҡлы вәкил

**ПОЛНОПРА́ВИЕ** *с* тулы хоҡуҡлылыҡ, тулы хоҡуҡлы булыу

**ПОЛНОПРА́ВНЫЙ,** -ая, -ое тулы хоҡуҡлы; **полнопра́вный граждани́н** тулы хоҡуҡлы гражданин

**ПО́ЛНОСТЬЮ** *нареч.* тулыһынса, тулыһы менән; **прочита́ть статью́ по́лностью** мәҡәләне тулыһынса уҡып сығыу

**ПОЛНОТА́** *ж* **1.** *в разн. знач.* тулылыҡ; **полнота́ сча́стья** бәхеттең тулылығы; **полнота́ вла́сти** хакимиәттең тулылығы **2.** (*тучность*) йыуантаҡлыҡ, тулылыҡ, һимеҙлек; **здоро́вая полнота́** таҙалыҡты күрһәткән тулылыҡ ♦ **от полноты́ души́ (чувств)** хистәрҙең тулылығынан, күңел ташыуҙан; **со всей полното́й (во всей полноте́)** бөтә тулылығы менән, тулыһынса

**ПО́ЛНОТЕ** *в знач. сказ., безл.* и *частица*; *разг.* етте, етер; **по́лноте шали́ть** шаярыу етер

**ПОЛНОЦЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тулы ҡиммәтле; **полноце́нная валю́та** тулы ҡиммәтле валюта **2.** яҡшы сифатлы, һәр яғы килгән; **полноце́нный проду́кт** яҡшы сифатлы аҙыҡ; **полноце́нное произведе́ние** яҡшы сифатлы әҫәр

**ПОЛНО́ЧНЫЙ, ПОЛУ́НОЧНЫЙ, ПОЛУНО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое төн уртаһы, төн уртаһы ...ы, төн уртаһындағы, ярты төндәге; **полно́чное вре́мя** ваҡыт төн уртаһы; **полно́чная моли́тва** төн уртаһындағы намаҙ

**ПО́ЛНОЧЬ** *ж* төн уртаһы, ярты төн; **о́коло полу́ночи** төн уртаһы тирәһе

**ПО́ЛНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *кого-чего, кем-чем* и *без. доп.* тулы; **по́лная су́мка** тулы сумка; **по́лный отве́т** тулы яуап; **по́лные вёдра** тулы биҙрәләр; **по́лный рабо́чий день** тулы эш көнө; **теа́тр по́лон зри́телей** театр тамашасы менән тулы **2.** (*абсолютный*) тулы, тулыһынса; **по́лная тишина́** тулы тынлыҡ; **по́лная побе́да** тулы еңеү; **по́лное разоруже́ние** тулыһынса ҡоралһыҙланыу; **предоста́вить по́лную свобо́ду** тулы ирек ҡуйыу **3.** *чего, чем*; *перен.* (*выражающий что-л.*) тулы, тулған; **по́лный ра́дости взгляд** шатлыҡ менән тулған ҡараш **4.** *перен.* (*увлечённый кем-чем-л.*) тәьҫиренә бирелгән, тәьҫирендә **5.** (*в меру толстый*) тулы, һимеҙ, йыуан; **по́лный мужчи́на** йыуан ир кеше ♦ **по́лная ча́ша** өй тулы байлыҡ, бай, хәлле; **в по́лном смы́сле сло́ва** ысындан да, ысын мәғәнәһендә; **на по́лном га́зе (газу́)** *см.* **газ**

**ПО́ЛО** *с нескл.*; *спорт.* поло (*һыбай туп уйнау*) ♦ **во́дное по́ло** һыуҙа туп уйнау

**ПОЛО́ВА** *ж*; *с.-х.* кәбәк

**ПОЛОВЕ́ЦКИЙ,** -ая, -ое ҡыпсаҡ ...ы; **полове́цкие пля́ски** ҡыпсаҡ бейеүҙәре

**ПОЛОВИ́К** *м* иҙән балаҫы

**ПОЛОВИ́НА** *ж* **1.** ярты, ярым; **полови́на я́блока** ярты алма; **полови́на рабо́ты** эштең яртыһы; **полови́на восьмо́го** һигеҙенсе ярты; **три с полови́ной** өс ярым; **втора́я полови́на двена́дцатого ве́ка** ун икенсе быуаттың икенсе яртыһы **2.** (*часть жилого помещения*) яҡ; **пере́дняя полови́на до́ма** өйҙөң алғы яғы ♦ **моя́ (твоя́ и т.п.) полови́на** *шутл.* минең (һинең һ.б.) йәмәғәт; **середи́на на полови́ну** *см.* **середи́на**

**ПОЛОВИ́ННЫЙ,** -ая, -ое ярты; **полови́нная до́ля** ярты өлөш; **полови́нная цена́** ярты хаҡ

**ПОЛОВИ́НЧАТОСТЬ** *ж* ярым-яртылыҡ; **полови́нчатость реше́ния** ҡарарҙың ярым-яртылығы

**ПОЛОВИ́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое ярым-ярты, ярты-йорто, икеле-микеле; **полови́нчатый отве́т** икеле-микеле яуап

**ПОЛОВИ́ЦА** *ж* иҙән таҡтаһы; **закрепи́ть полови́цы** иҙән таҡталарын нығытыу

**ПОЛО́ВНИК** *м*; *разг.* аш сүмесе

**ПОЛОВО́ДЬЕ** *с* ташҡын, һыу ташыу; **весе́ннее полово́дье** яҙғы ташҡын

**ПОЛОВО́Й I,** -ая, -ое иҙән ...ы; **полова́я тря́пка** иҙән сепрәге

**ПОЛОВО́Й II,** -ая, -ое **1.** енес ...ы; **половы́е о́рганы** енес ағзалары; **половы́е клéтки** енес күҙәнәктәре **2.** (*связанный с отношениями полов*) енси; **полова́я жизнь** енси тормош; **полово́е чу́вство** енси тойғо; **полова́я зре́лость** енси өлгөргәнлек

**ПО́ЛОВЦЫ** *мн.* (*ед.* **по́ловец** *м* и **половча́нка** *ж*); *ист.* ҡыпсаҡтар (*боронғо төрки халыҡ*)

**ПО́ЛОГ** *м* **1.** сымылдыҡ, шаршау; **опусти́ть по́лог** сымылдыҡ төшөрөү **2.** *чего*; *перен.* ҡараңғылыҡ; **под по́логом но́чи** төн ҡараңғылығында

**ПОЛО́ГИЙ,** -ая, -ое һөҙәк; **поло́гий бе́рег** һөҙәк яр; **поло́гая ле́стница** һөҙәк баҫҡыс

**ПОЛО́ГОСТЬ** *ж* һөҙәклек; **поло́гость холма́** ҡалҡыулыҡтың һөҙәклеге

**ПОЛОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** урын, торош; **географи́ческое положе́ние** географик урын; **определи́ть положе́ние плане́ты** планетаның торошон билдәләү **2.** (*поза*) килеш, көй, торош; **неудо́бное положе́ние головы́** баштың уңайһыҙ торошо; **чита́ть в лежа́чем положе́нии** ятҡан көйө уҡыу **3.** *в разн. знач.* хәл; **вое́нное положе́ние** һуғыш хәле; **междунаро́дное положе́ние** халыҡ-ара хәл; **семе́йное положе́ние** ғаилә хәле; **социа́льное положе́ние** социаль хәл; **войти́ в положе́ние** *чьё-л. берәйһенең* хәленә инеү; **находи́ться в затрудни́тельном положе́нии** ҡыйын хәлдә булыу **4.** ҡағиҙә; **положе́ние о вы́борах** һайлауҙар тураһында ҡағиҙә; **положе́ние о систе́ме опла́ты труда́** хеҙмәткә түләү системаһы тураһында ҡағиҙә **5.** фекер; **основны́е положе́ния кни́ги** китаптың төп фекерҙәре ♦ **в (интере́сном) положе́нии** йөклө, балаға уҙған

**ПОЛО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **положи́ть 2.** *прил.* тейешле, билдәләнгән; **в поло́женное вре́мя** билдәләнгән ваҡытта; **поло́женная пла́та** билдәләнгән түләү

**ПОЛОЖИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* **1.** ыңғай; **отве́тить положи́тельно** ыңғай яуап биреү **2.** *в знач. частицы* (*совсем*) бөтөнләй; **он положи́тельно ничего́ не сде́лал** ул бөтөнләй бер нәмә эшләмәгән

**ПОЛОЖИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* ыңғай; **положи́тельный отве́т** ыңғай яуап; **положи́тельная величина́** *мат.* ыңғай дәүмәл; **положи́тельная оце́нка** ыңғай баһа; **положи́тельное влия́ние** ыңғай тәьҫир; **положи́тельный заря́д** *физ.* ыңғай заряд; **положи́тельное число́** *мат.* ыңғай һан **2.** (*деловой, практический*) эшлекле, төплө; **положи́тельный ум** төплө аҡыл; **положи́тельный челове́к** эшлекле кеше **3.** *уст.* (*определённый, окончательный*) өҙөп кенә, ҡырт киҫелгән, ҡырҡа хәл ителгән, өҙә һуғылған, ҡырҡа, ҡәтғи; **положи́тельный отка́з** ҡырҡа кире ҡағыу; **ничего́ положи́тельного не сказа́ть** өҙөп кенә бер нимә лә әйтмәү

**ПОЛОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, чего* ҡуйыу, һалыу, урынлаштырыу; **положи́ть вещь на своё ме́сто** әйберҙе үҙ урынына ҡуйыу; **положи́ть са́хар в чай** сәйгә шәкәр һалыу; **положи́ть де́ньги в сберба́нк** аҡсаны һаҡлыҡ банкыһына һалыу; **положи́ть больно́го в больни́цу** ауырыуҙы хәстәханаға һалыу **2.** *в 1 л. мн. ч. буд. вр.* **поло́жим** *в знач. вводн. сл.* әйтәйек, ти; шулай булды, ти; **поло́жим, что мы оши́блись** әйтәйек, беҙ яңылышҡанбыҙ, ти ♦ **положа́ ру́ку на́ сердце** ысын күңелдән; **положи́ть го́лову** *высок.* башты һалыу, ҡорбан булыу; **положи́ть жизнь** *за кого-что* үҙеңде ҡорбан итеү; **положи́ть на о́бе лопа́тки** *кого*: 1) *спорт.* арҡаһына әйләндереп һалыу, салҡан һалыу; 2) (*победить*) бәхәстә еңеү (еңеп сығыу)

**ПОЛОЖИ́ТЬСЯ** *сов.* ышаныу, иҫәп тотоу, таяныу, һыйыныу; **вы мо́жете на меня́ положи́ться** һеҙ миңә таяна алаһығыҙ

**ПО́ЛОЗ I** *м* **1.** (*у саней*) сана табаны; **скрип поло́зьев** сана табандарының шығырлауы **2.** *спец.* (*скользящий брус*) шылдырғыс (*ауыр нәмәне шыуҙырыу өсөн ҡулланылған ағас һ.б.*)

**ПО́ЛОЗ II** *м* сыбар йылан (*ағыуһыҙ*)

**ПОЛО́К** *м* **1.** (*в бане*) әләүкә **2.** *спец.* (*телега с плоским настилом*) яҫы арба

**ПОЛО́ЛЬНИК** *м*; *с.-х.* (*орудие*) сүп утағыс, утауыс

**ПОЛО́ЛЬЩИК** *м* утаусы

**ПОЛОМА́ТЬ** *сов. что* һындырыу, ватыу, һындырып (ватып) бөтөрөү; **ве́тер полома́л ве́тки дере́вьев** ел ағас ботаҡтарын һындырып бөткән

**ПОЛОМА́ТЬСЯ** *сов.* һыныу, ватылыу, һынып (ватылып) бөтөү

**ПОЛО́МКА** *ж* **1.** *см.* **полома́ть**, **полома́ться 2.** (*повреждённое место*) ватыҡ, һыныҡ

**ПОЛОНЕ́З** *м* полонез (*бейеү һәм шуның көйө*)

**ПОЛО́НИЙ** *м* полоний (*химик элемент, металл*)

**ПОЛОСА́** *ж* **1.** оҙонса киҫәк, таҫма киҫәк, буй; **полоса́ желе́за** оҙонса ҡалай киҫәге; **разре́зать бума́гу на по́лосы** ҡағыҙҙы буй-буй ҡырҡыу **2.** буй, һыҙыҡ, юлаҡ; **кра́сные по́лосы на платке́** яулыҡтағы ҡыҙыл һыҙыҡтар **3.** (*зона*) һыҙат; **полоса́ ле́са** урман һыҙаты; **чернозёмная полоса́** ҡара тупраҡ һыҙаты **4.** *перен.* (*период*) дәүер, осор; **счастли́вая полоса́ в жи́зни** тормоштоң бәхетле осоро **5.** *полигр.* бит; **пе́рвая полоса́ газе́ты** гәзиттең тәүге бите

**ПОЛОСА́ТЫЙ,** -ая, -ое буйлы, юлаҡлы, тарғыл; **полоса́тый хала́т** буйлы халат; **полоса́тые обо́и** юлаҡлы обой; **полоса́тая змея́** тарғыл йылан

**ПОЛО́СКА** *ж*; *уменьш. от* **полоса́** 1, 2; **поло́ска бума́ги** тар ғына ҡағыҙ киҫәге ♦ **в поло́ску** буй-буй

**ПОЛОСКА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **полоска́ть**, **полоска́ться**; **полоска́ние белья́** кер сайҡау **2.** (*лекарство*) (тамаҡ, ауыҙ) сайҡау дарыуы

**ПОЛОСКА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* сынаяҡ сайҡау һауыты

**ПОЛОСКА́ТЬ** *несов. что* **1.** сайҡау; **полоска́ть бельё** кер сайҡау; **полоска́ть рот** ауыҙ сайҡау **2.** *чем* (*колебать — о ветре*) елберләтеү, елпелдәтеү, елбер-елбер иттереү, сайҡалдырыу; **ве́тер поло́щет зна́мя** ел байраҡты елберләтә

**ПОЛОСКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** сәпелдәшеү, супырлашыу; **ма́льчики поло́щутся в реке́** малайҙар йылғала сәпелдәшә **2.** (*развеваться на ветру*) елберләү, сайҡалыу

**ПОЛОСНУ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* һыҙыра һуғыу, ялландырып (тартып) ебәреү, әләктереү; **полосну́ть кнуто́м** ҡамсы менән әләктереү

**ПОЛОСОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого*; *разг.* (*бить, оставляя рубцы*) ялландырыу, яра һуғыу

**2.** *что*; *тех*. буй-буй (итеп) телеү (ҡырҡыу); **полосова́ть жесть** ҡалайҙы буй-буй итеп ҡырҡыу

**ПОЛОСОВО́Й,** -ая, -ое *тех*. буй-буй теленгән, таҫмалап ҡырҡылған; **полосово́е желе́зо** таҫмалап ҡырҡылған ҡалай

**ПО́ЛОСТЬ I** *ж*; *анат*. ҡыуышлыҡ; **грудна́я по́лость** күкрәк ҡыуышлығы; **по́лость рта** ауыҙ ҡыуышлығы

**ПО́ЛОСТЬ II** *ж*; *уст*. аяҡ ябыуы (*арба-саналағы дилбегәсенең аяғына ябылған тире һ.б.*)

**ПОЛОТЕ́НЕЧНЫЙ,** -ая, -ое таҫтамаллыҡ; **полоте́нечная ткань** таҫтамаллыҡ туҡыма

**ПОЛОТЕ́НЦЕ** *с* таҫтамал; **ручно́е полоте́нце** ҡул таҫтамалы

**ПОЛОТЁР** *м* иҙән шымартыусы

**ПОЛО́ТНИЩЕ** *с* **1.** иң; **па́рус в четы́ре поло́тнища** дүрт иңле елкән **2.** *спец*. яҫылыҡ; **поло́тнище пилы́** бысҡының яҫылығы

**ПОЛОТНО́** *с* **1.** (*ткань*) киндер, туҡыма; **шта́пельное полотно́** штапель туҡыма; **руба́шка из шёлкового полотна́** ебәк туҡыманан тегелгән күлдәк **2.** *жив*. һүрәт, рәсем (*гәҙәттә, киндергә төшөрөлә*); **полотно́ Ре́пина** Репин рәсеме **3.** *спец*. таҫма; **полотно́ конве́йера** конвейер таҫмаһы **4.** (*покрытие дороги, моста и т.п.*) полотно (*таш, ҡом һ.б. торған юл өйөмө, шундай юл*)

**ПОЛО́ТЬ** *несов. что* утау

**ПОЛОУ́МИЕ** *с*; *разг*. ярты аҡыллыҡ, аҡылға һайлыҡ

**ПОЛОУ́МНЫЙ,** -ая, -ое *разг*. ярты аҡыл, аҡылға һай

**ПОЛПУТИ́** *м* ярты юл; **верну́ться с полпути́** ярты юлдан ҡайтыу ♦ **на полпути́ (бро́сить, останови́ться и т.п.)** ярты юлда (ҡалдырыу, туҡтау һ.б.); **бро́сить рабо́ту на полпути́** эште ярты юлда ҡалдырыу

**ПОЛСО́ТНИ** *ж*; *разг*. ярты йөҙ, илле

**ПОЛТИ́ННИК** *м*; *разг*. илле тин, ярты тәңкә, илле тин көмөш

**ПОЛТОРА́** *м* и *с* (**полторы́** *ж*) *числ*. бер ярым; **полтора́ ме́тра** бер метр ярым; **в полтора́ ра́за бо́льше** бер ярым тапҡыр күберәк

**ПОЛТОРА́СТА** *числ*. йөҙ илле; **полтора́ста киломе́тров** йөҙ илле километр

**ПОЛТОРЫ́** *ж числ. см.* **полтора́**

**ПОЛУ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ярты", "ярым", "яртылаш" йәки "тулыһынса булмаған", "тиерлек" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **полуди́кий** ярым ҡырағай; **полушерстяно́й** яртылаш йөн; **полукольцо́** ярым ҡулса

**ПОЛУБОТИ́НКИ** *мн*. (*ед*. **полуботи́нок** *м*) ҡуныҫһыҙ (ҡыҫҡа ҡуныслы, һай) ботинка

**ПОЛУГЛА́СНЫЙ,** -ая, -ое *лингв*. ярым һуҙынҡы

**ПОЛУГО́ДИЕ** *с* ярты йыл, ярты йыллыҡ; **пе́рвое полуго́дие уче́бного го́да** уҡыу йылының беренсе яртыһы

**ПОЛУГОДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ярты йыллыҡ; **полугоди́чные ку́рсы** ярты йыллыҡ курстар

**ПОЛУГОДОВА́ЛЫЙ,** -ая, -ое ярты йәштәге (йәшлек); **полугодова́лый ребёнок** ярты йәшлек бала

**ПОЛУГОДОВО́Й,** -ая, -ое ярты йыллыҡ; **полугодово́й отчёт** ярты йыллыҡ хисап

**ПОЛУГОЛО́ДНЫЙ,** -ая, -ое ярым ас, аслы-туҡлы; **полуголо́дное существова́ние** аслы-туҡлы көн күреү

**ПОЛУГО́ЛЫЙ,** -ая, -ое ярым яланғас

**ПОЛУГРА́МОТНЫЙ,** -ая, -ое ярым-йорто (бик аҙ) белемле, ярым наҙан; **полугра́мотный челове́к** ярым-йорто белемле кеше

**ПОЛУ́ДА** *ж* **1.** *см.* **луже́ние 2.** (*слой олова, нанесённый на поверхность металла*) йоҡа ғына ҡурғаш ҡатлам

**ПОЛУ́ДЕННЫЙ,** -ая, -ое төшкө, төш (көн) уртаһындағы (ваҡытындағы); **полу́денный зной** көн уртаһындағы эҫелек; **полу́денная до́йка** төшкө һауым

**ПОЛУДИ́КИЙ,** -ая, -ое ярым ҡырағай; **полуди́кая я́блоня** ярым ҡырағай алмағас; **полуди́кие племена́** ярым ҡырағай ҡәбиләләр

**ПОЛУЖИВО́Й,** -ая, -ое саҡ-саҡ тере, үлер сиккә еткән; **быть полуживы́м от стра́ха** ҡурҡыштан үлер сиккә етеү

**ПОЛУЖИ́РНЫЙ,** -ая, -ое *полигр*. ярым ҡалын; **полужи́рный шрифт** ярым ҡалын шрифт

**ПОЛУЗАБЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое ярым онотолған, онотолоп барған; **полузабы́тая пе́сня** ярым онотолған йыр

**ПОЛУЗАБЫТЬЁ** *с* ярым һушһыҙлыҡ

**ПОЛУЗАЩИ́ТА** *ж*; *спорт*. ярым һаҡ (*футбол йәки хоккейҙа*)

**ПОЛУЗАЩИ́ТНИК** *м*; *спорт*. ярым һаҡсы

**ПОЛУКОЛОНИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ярым колониаль; **полуколониа́льные стра́ны** ярым колониаль илдәр

**ПОЛУКОЛО́НИЯ** *ж* ярым колония

**ПОЛУКОЧЕВО́Й,** -ая, -ое ярым күсмә; **полукочево́е скотово́дство** ярым күсмә малсылыҡ

**ПОЛУКРУ́Г** *м* ярым түңәрәк; **описа́ть полукру́г** ярым түңәрәк һыҙыу

**ПОЛУКРУ́ГЛЫЙ,** -ая, -ое ярым түңәрәк; **полукру́глое окно́** ярым түңәрәк тәҙрә

**ПОЛУЛЕЖА́ТЬ** *несов*. ҡырын (яртылаш) ятып тороу

**ПОЛУМА́СКА** *ж* ярым битлек (маска)

**ПОЛУМЕ́РА** *ж* ярым-йорто сара; **поли́тика полуме́р** ярым-йорто саралар сәйәсәте

**ПОЛУМЕ́СЯЦ** *м* ярты ай (*айҙың ярым түңәрәк сағы, ай урағы*)

**ПОЛУМРА́К** *м* ярым ҡараңғылыҡ (ҡараңғы)

**ПОЛУНО́ЧНИК** *м* и **ПОЛУНО́ЧНИЦА** *ж*; *разг*. төн ҡошо (пәрейе)

**ПОЛУНО́ЧНИЧАТЬ** *несов*.; *разг*. кис (төнөн) оҙаҡ ултырыу

**ПОЛУОБОРО́Т** *м* ярты әйләнеш; **полуоборо́т колеса́** тәгәрмәстең ярты әйләнеше

**ПОЛУОСВЕЩЁННЫЙ,** -ая, -ое әҙ генә яҡтыртылған; **полуосвещённая ко́мната** әҙ генә яҡтыртылған бүлмә

**ПОЛУО́СТРОВ** *м* ярымутрау

**ПОЛУПАЛЬТО́** *с* ҡыҫҡа пальто

**ПОЛУПРОВОДНИ́К** *м*; *физ.* ярым үткәргес

**ПОЛУПРОВОДНИКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *физ.* **1.** ярым үткәргес; **полупроводнико́вое вещество́** ярым үткәргес матдә **2.** ярым үткәргесле; **полупроводнико́вый радиоприёмник** ярым үткәргесле радиоалғыс

**ПОЛУПУСТЫ́НЯ** *ж* ярымсүл

**ПОЛУРАЗРУ́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое яртылаш емерек; **полуразру́шенный дом** яртылаш емерек өй, емерелеп барған (бөткән) өй

**ПОЛУСАПО́ЖКИ** *мн.* (*ед.* **полусапо́жек** *м*) ҡыҫҡа ҡуныслы итек

**ПОЛУСВЕ́Т** *м* ярым яҡтылыҡ, ҡараңғылы-яҡтылы (*ваҡыт, урын, саҡ*); **у́тренний полусве́т** иртәнге ярым яҡтылыҡ

**ПОЛУСЛО́ВО** *с* һүҙҙең яртыһы, ярты һүҙ ♦ **на полусло́ве прерва́ть (останови́ть и т.п.)** ярты һүҙҙән бүлеү (туҡтатыу һ.б.); **с полусло́ва (поня́ть)** ярты һүҙҙән үк (аңлау)

**ПОЛУСМЕ́РТЬ: до полусме́рти** үлтергәнсе, үлер хәлгә еткәнсе, ныҡ; **испуга́ть до полусме́рти** ныҡ ҡурҡытыу

**ПОЛУСО́Н** *м* уяулы-йоҡоло хәл, йоҡо аралаш хәл

**ПОЛУСО́ННЫЙ,** -ая, -ое уяулы-йоҡоло, йоҡо аралаш, ярым йоҡоло; **быть полусо́нным** уяулы-йоҡоло булыу; **полусо́нный го́лос** ярым йоҡоло тауыш

**ПОЛУСТА́НОК** *м* бәләкәй станция

**ПОЛУТЕ́НЬ** *ж* ярым күләгә, шәүлә

**ПОЛУТО́Н** *м* **1.** *муз.* ярым тон (*ун ике баҫҡыслы иң бәләкәй интервал*) **2.** *жив.* (*переход от светлого к тёмному*) шыйыҡ төҫ, аҡһыл төҫтәр **3.** көсһөҙ тауыш

**ПОЛУ́ТОРА...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "(бер) ярым", "(бер) ярымлыҡ" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **полуторагоди́чный** йыл (йәш) ярымлыҡ

**ПОЛУ́ТОРКА** *ж*; *разг.* полуторка (*тонна ярымлыҡ йөк машинаһы*)

**ПОЛУ́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое бер ярымлыҡ, бер ярым; **в полу́торном разме́ре** бер ярым ҙурлыкта (күләмдә)

**ПОЛУТЬМА́** *ж* ярым ҡараңғылыҡ

**ПОЛУФАБРИКА́Т** *м* ярым фабрикат (*артабан эшкәртелергә тейешле аҙыҡ*)

**ПОЛУФИНА́Л** *м*; *спорт.* ярым финал; **вы́йти в полуфина́л** ярым финалға сығыу

**ПОЛУЧАСОВО́Й,** -ая, -ое ярты сәғәтлек; **получасова́я бесе́да** ярты сәғәтлек әңгәмә

**ПОЛУЧА́ТЕЛЬ** *м* и **ПОЛУЧА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* алыусы, ҡабул итеүсе; **получа́тель почто́вого перево́да** почта менән ебәрелгән аҡсаны алыусы

**ПОЛУЧА́ТЬ** *несов. см.* **получи́ть**

**ПОЛУЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **получи́ться 2.** *страд. от* **получа́ть**

**ПОЛУЧЕ́НИЕ** *с см.* **получи́ть — получа́ть**; **получе́ние образова́ния** белем алыу; **получе́ние пода́рка** бүләк алыу

**ПОЛУЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *в разн. знач.* алыу, ҡабул итеү; **получи́ть зарпла́ту** эш хаҡы алыу; **получи́ть зака́з** заказ алыу; **получи́ть большо́й урожа́й** мул уңыш алыу; **получи́ть вы́говор** шелтә алыу; **получи́ть хоро́шее воспита́ние** яҡшы тәрбиә алыу **2.** алыу, сығарыу; **получи́ть бензи́н из не́фти** нефттән бензин алыу **3.** *разг.* (*заболеть*) эләктереү, сир (киҙеү) йоҡтороу; **получи́ть на́сморк** тымау эләктереү ♦ **получи́ть изве́стность** дан ҡаҙаныу; **получи́ть поврежде́ние** йәрәхәтләнеү; **получи́ть призна́ние** танылыу; **получи́ть примене́ние** ҡулланыла башлау; **получи́ть распростране́ние** таралыу; **получи́ть удово́льствие** хозурланыу, ҡәнәғәтлек алыу; **получи́ть по ша́пке** кәрәгенде алыу

**ПОЛУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* килеп (булып) сығыу; **результа́т получи́лся прекра́сный** һөҙөмтә бик яҡшы булып сыҡты; **получи́лось недоразуме́ние** аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡты

**ПОЛУ́ЧКА** *ж*; *разг.* эш хаҡы; **была́ полу́чка** эш хаҡы булды

**ПОЛУША́РИЕ** *с* ярымшар; **Се́верное полуша́рие** Төньяҡ ярымшар

**ПОЛУШЁЛКОВЫЙ,** -ая, -ое ярым ебәк, ебәк ҡатыш; **полушёлковая мате́рия** ярым ебәк туҡыма

**ПОЛУШЕРСТЯНО́Й,** -ая, -ое ярым йөн, йөн ҡатыш; **полушерстяна́я ткань** йөн ҡатыш туҡыма

**ПОЛУ́ШКА** *ж*; *уст.* сирек тин (*боронғо баҡыр аҡса*)

**ПОЛУШУ́БОК** *м* ҡыҫҡа тун; **носи́ть полушу́бок** ҡыҫҡа тун кейеү

**ПОЛУШУТЯ́** *нареч.* уйынлы-ысынлы; **сказа́ть полушутя́** уйынлы-ысынлы әйтеү

**ПОЛЦЕНЫ́** *ж* ярты хаҡ; **прода́ть за полцены́** *что-л. ниҙәлер* ярты хаҡына һатыу

**ПОЛЧАСА́** *м* ярты сәғәт; **за полчаса́ до отхо́да по́езда** поезд китеүгә ярты сәғәт ҡалғанда

**ПО́ЛЧИЩА** *мн.* (*ед.* **по́лчище** *с*) **1.** ишле ғәскәр, оло яу **2.** *кого*; *перен.* өйөр, көтөү; **по́лчища граче́й** ҡара ҡарғалар өйөрө

**ПОЛШАГА́** *м* ярты аҙым; **сде́лать полшага́ впра́во** ярты аҙым уң яҡҡа атлау; **отступи́ть на полшага́** ярты аҙымға сигенеү

**ПО́ЛЫЙ,** -ая, -ое эсе ҡыуыш, ҡыуыш эсле; **по́лый шар** эсе ҡыуыш шар; **по́лый сте́бель** ҡыуыш эсле һабаҡ ♦ **по́лая вода́** яҙғы ташҡын һыуы

**ПО́ЛЫМЯ** *с*; *трад.-поэт.* ялҡын ♦ **из огня́ да в по́лымя** *см.* **ого́нь**

**ПОЛЫ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** әрем ...ы; **полы́нный за́пах** әрем еҫе; **полы́нные кусты́** әрем ҡыуаҡтары **2.** әремле; **полы́нный ликёр** әремле ликёр **3.** (*заросший полынью*) әремле; **полы́нная степь** әремле дала

**ПОЛЫ́НЬ** *ж* әрем; **за́пах полы́ни** әрем еҫе

**ПОЛЫНЬЯ́** *ж* йылыу, ҡаран; **вода́ в полынье́ не замерза́ет** ҡаранда һыу туңмай

**ПОЛЫСЕ́ТЬ** *сов.* пеләшләнеү, сәс ҡойолоу

**ПОЛЫХА́ТЬ** *несов.* дөрләп (шәп итеп, ялҡынланып) яныу; **ого́нь полыха́л** ут дөрләп янды

**ПО́ЛЬЗА** *ж* **1.** ярҙам, файҙа; **с по́льзой для де́ла** эшкә файҙа булһын өсөн; **по́льза спо́рта** спорттың файҙаһы; **извле́чь по́льзу** *из чего-л.* *нимәнәндер* файҙа сығарып алыу; **для о́бщей по́льзы** дөйөм файҙа өсөн **2.** *разг.*, *уст.* (*барыш*) килем, табыш, өҫтәмә мал (аҡса) ♦ **в по́льзу** *чью* файҙаһына; **вы́сказаться в по́льзу** *кого-л.* *кемдеңдер* файҙаһына һөйләү

**ПО́ЛЬЗОВАНИЕ** *с см.* **по́льзоваться** 1; **находи́ться в о́бщем по́льзовании** дөйөм файҙаланыуҙа булыу; **пра́во по́льзования** файҙаланыу хоҡуғы

**ПО́ЛЬЗОВАТЬСЯ** *несов. чем* **1.** файҙаланыу, ҡулланыу; **по́льзоваться услу́гами телегра́фа** телеграф хеҙмәтен файҙаланыу; **по́льзоваться нове́йшими исто́чниками** өр-яңы сығанаҡтарҙы файҙаланыу; **по́льзоваться хирурги́ческим инструме́нтом** хирургия ҡорамалын ҡулланыу **2.** (*обладать чем-л.*) эйә булыу, ҡаҙаныу; **по́льзоваться авторите́том** абруй ҡаҙаныу; **по́льзоваться свобо́дой** иреккә эйә булыу; **по́льзоваться успе́хом** уңыш ҡаҙаныу

**ПО́ЛЬКА I** *ж см.* **поля́ки**

**ПО́ЛЬКА II** *ж* полька (*бейеү һәм шуға яҙылған музыка әҫәре*); **танцева́ть по́льку** полька бейеү

**ПО́ЛЬКА III** *ж* полька (*ирҙәр причёскаһы*)

**ПО́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое поляк ...ы, Польша ...ы; **по́льский наро́д** поляк халҡы; **по́льский язы́к** поляк теле

**ПОЛЬСТИ́ТЬ** *сов. кому* и *без доп.* ялағайланып (ярарға тырышып) маҡтау

**ПОЛЬСТИ́ТЬСЯ** *сов. на кого-что*; *разг.* ҡыҙығыу, күҙ ҡыҙыу; **польсти́ться на дороги́е пода́рки** затлы бүләктәргә ҡыҙығыу

**ПОЛЮБИ́ТЬ** *сов. кого-что* һөйөү, яратыу, ғашиҡ булыу; **полюби́ть теа́тр** театрҙы яратыу, театрға ғашиҡ булыу; **полюби́ть чита́ть** уҡырға яратыу; **он полюби́л её стра́стно** ул уны (ҡыҙҙы) өҙөлөп яратты

**ПОЛЮБИ́ТЬСЯ** *сов. кому*; *разг.* күңелгә оҡшау; **э́ти стихи́ мне полюби́лись** был шиғырҙар минең күңелгә оҡшаны

**ПОЛЮБОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һоҡланып (ҡыҙығып, кинәнеп, шатланып) ҡарау; **я полюбова́лся восхо́дом со́лнца** мин ҡояш сығыуын һоҡланып ҡарап торҙом **2.** *повел.* **полюбу́йся**, **полюбу́йтесь**; *неодобр.*, *разг.* бына ҡара(ғыҙ) инде (*ниндәй насар, йүнһеҙ һ.б. мәғәнәһендә*)

**ПОЛЮБО́ВНЫЙ,** -ая, -ое дуҫтарса, дуҫлыҡ нигеҙендә, татыулыҡ менән; **полюбо́вное соглаше́ние** дуҫлыҡ нигеҙендә килешеү

**ПОЛЮБОПЫ́ТСТВОВАТЬ** *сов.* ҡыҙыҡһыныу, белге килеү, айышына төшөнөргә тырышыу

**ПО́ЛЮС** *м* **1.** *в разн. знач.* ҡотоп, полюс; **Се́верный по́люс** Төньяҡ ҡотоп; **Ю́жный по́люс** Көньяҡ ҡотоп; **по́люс хо́лода** һыуыҡлыҡ ҡотобо (*иң түбән температуралар өлкәһе*); **по́люс ветро́в** елдәр ҡотобо **2.** *физ.* полюс; **положи́тельный по́люс** ыңғай полюс; **отрица́тельный по́люс** кире полюс

**ПОЛЯ́КИ** *м* поляктар, поляк халҡы // *ед.* **поля́к** *м* поляк ир-аты; **по́лька** и *разг.* **поля́чка** *ж* поляк ҡатын-ҡыҙы

**ПОЛЯ́НА** *ж* аҡлан; **больша́я поля́на** ҙур аҡлан; **собира́ть цветы́ на поля́не** аҡланда сәскә йыйыу

**ПОЛЯ́РНИК** *м* ҡотопсо, ҡотопто өйрәнеүсе

**ПОЛЯ́РНОСТЬ** *ж* ҡапма-ҡаршылыҡ; **поля́рность мне́ний** фекерҙәрҙең ҡапма-ҡаршылығы

**ПОЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** поляр; **поля́рные острова́** поляр утрауҙар; **поля́рная ста́нция** поляр станция **2.** *физ.* поляр; **поля́рные соедине́ния** поляр берләшмәләр **3.** *перен.* (*противоположный*) ҡапма-ҡаршы; **поля́рные ка́чества** ҡапма-ҡаршы сифаттар ♦ **поля́рный день** поляр көн (*Поляр түңәрәктә айлап ҡояш байымай торған ваҡыт*); **Поля́рный круг** Поляр түңәрәк (*төньяҡ һәм көньяҡ ярымшарҙарҙың экваторҙан 66°32′-та ятҡан параллель һыҙығы — һыуыҡ бүлкәттең сиге*); **поля́рная ночь** поляр төн (*Поляр түңәрәктә айлап ҡояш ҡалҡмай торған ваҡыт*); **поля́рное сия́ние** *см.* **сия́ние**

**ПОМА́ДА: губна́я пома́да** ирен буяуы, помада

**ПОМА́ДКА** *ж* помадка (*кәнфиттең йомшаҡ төрө*); **фрукто́вая пома́дка** емеш помадкаһы

**ПОМА́ЗАТЬ** *сов. что* буяу, майлау, яғыу, һөртөнөү; **пома́зать хлеб ма́слом** икмәккә май яғыу

**ПОМА́ЗАТЬСЯ** *сов.* һөртөнөү, яғыныу, буяныу; **пома́заться вазели́ном** вазелин һөртөнөү

**ПОМАЗО́К** *м* майлағыс, бәләкәй бумала

**ПОМАКА́ТЬ** *сов. что* манып алыу; **помака́ть хлеб в варе́нье** икмәкте ҡайнатмаға манып алыу

**ПОМАЛЕ́НЬКУ** *нареч.*; *разг. см.* **понемно́гу**

**ПОМА́ЛКИВАТЬ** *несов.*; *разг.* өндәшмәү, ауыҙ асмау, шым булыу

**ПОМАНИ́ТЬ** *сов. кого* ымлап (ишаралап) саҡырыу; **помани́ть па́льцем** бармаҡ менән ымлап саҡырыу

**ПОМА́РКА** *ж* төҙәтмә, төҙәтелгән урын (*яҙыуҙа*)

**ПОМА́СЛИТЬ** *сов. что*; *разг.* майлау, май яғыу (һөртөү); **пома́слить блин** ҡоймаҡ майлау

**ПОМАХА́ТЬ** *сов. чем* болғау, һелкеү; **помаха́ть платко́м на проща́нье** хушлашҡанда яулыҡ болғау

**ПОМА́ХИВАТЬ** *несов. чем* болғаштырыу, һелккеләү, болғап-болғап ҡуйыу, һелкеп-һелкеп ҡуйыу; **соба́ка пома́хивает хвосто́м** эт ҡойроғон болғап-болғап ҡуя

**ПОМЕ́ДЛИТЬ** *сов.* көттөрөү, кисектереү, һуҙыу; **поме́длить с отве́том** яуапты көттөрөү

**ПОМЕЛО́** *с* бумала, мөрйә таҙартҡыс; **прочи́стить дымохо́д помело́м** төтөн юлын бумала менән таҙартыу

**ПОМЕНЯ́ТЬ** *сов.*; *см.* **меня́ть** 1; **поменя́ть колесо́** тәгәрмәсте алмаштырыу

**ПОМЕНЯ́ТЬСЯ** *сов.* алмашыу, алышыу

**ПОМЕРА́НЕЦ** *м* әсе әфлисун

**ПОМЕРЕ́ТЬ** *сов.*; *прост. см.* **умере́ть**

**ПОМЕРЕ́ЩИТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **мере́щиться**; **э́то тебе́ помере́щилось** был һиңә шулай тойолған

**ПОМЁРЗНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*погибнуть от мороза*) өшөп (туңып) һәләк булыу; **цветы́ помёрзли** сәскәләр туңып һәләк булған **2.** (*пробыть некоторое время на морозе*) туңып (өшөп) бөтөү

**ПОМЕ́РИТЬ** и *разг.* **ПОМЕ́РЯТЬ** *сов. что*; *разг. см.* **приме́рить**; **поме́рить пла́тье** күлдәкте кейеп ҡарау

**ПОМЕ́РИТЬСЯ** и *разг.* **ПОМЕ́РЯТЬСЯ** *сов. см.* **ме́риться** 1; **поме́риться ро́стом** буй менән үлсәшеү; **поме́риться си́лами** көс һынашыу

**ПОМЕ́РКНУТЬ** *сов.* **1.** тоноҡланыу, тоноҡланып китеү; **звёзды поме́ркли** йондоҙҙар тоноҡланды **2.** *перен.* һүнеү, һүнеп ҡалыу; **сла́ва его́ поме́ркла** уның даны һүнде

**ПОМЕРТВЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое ҡобараһы осҡан, төҫө ҡасҡан, көл кеүек ағарған; **помертве́лое лицо́** ҡобараһы осҡан йөҙ

**ПОМЕРТВЕ́ТЬ** *сов. см.* **мертве́ть** 1, 2; **помертве́ть от стра́ха** ҡурҡыуҙан ҡатып ҡалыу

**ПОМЕСТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое (күп) һыйҙырышлы (һыйҙырмалы); **помести́тельный дом** күп кеше һыйҙырышлы өй

**ПОМЕСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*поселить*) *кого-что* урынлаштырыу, йәшәр (торор) урынға индереү; **помести́ть тури́стов в гости́ницу** туристарҙы ҡунаҡханаға урынлаштырыу **2.** (*уместить*) урынлаштырып (һыйҙырып) бөтөү; **помести́ть все ве́щи в оди́н чемода́н** бөтә әйберҙе бер сумаҙанға һыйҙырып бөтөү **3.** *что* (*вложить*) һалыу; **помести́ть де́ньги в сберба́нк** аҡсаны һаҡлыҡ банкыһына һалыу

**ПОМЕСТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** урынлашыу; **где вы помести́лись?** һеҙ ҡайҙа урынлаштығыҙ? **2.** һыйыу; **кни́ги не помести́лись на одно́й по́лке** китаптар бер кәштәгә һыйып бөтмәне

**ПОМЕ́СТЬЕ** *с* поместье, алпауыт ере

**ПО́МЕСЬ** *ж* аҙман, ҡатнаш тоҡом

**ПОМЕ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое ай һайынғы, айлыҡ; **поме́сячная пла́та** ай һайынғы түләү; **поме́сячный дохо́д** айлыҡ килем

**ПОМЁТ** *м* **1.** тиҙәк; **пти́чий помёт** ҡош тиҙәге **2.** имсәктәш, ҡарындаш, бер оялаш (*ҡайһы бер хайуандан бер юлы тыуған балалар, мәҫ., көсөктәр, сусҡа бәрәстәре һ.б.*); **щенки́ весе́ннего помёта** яҙғы көсөктәр

**ПОМЕ́ТА** *ж* билдә; **де́лать поме́ты на поля́х кни́ги** китап биттәре ситенә билдәләр ҡуйыу; **граммати́ческие поме́ты** грамматик билдәләр

**ПОМЕ́ТИТЬ** *сов. кого-что* билдәләү, тамғалау, билдә ҡуйыу, тамға һалыу; **поме́тить ове́ц** һарыҡтарға тамға һалыу

**ПОМЕ́ТКА** *ж см.* **поме́та**

**ПОМЕ́ХА** *ж* ҡамасау, оронсоҡ, тотҡар; **быть поме́хой** оронсоҡ булыу; **служи́ть поме́хой** тотҡар булып тороу

**ПОМЕЧА́ТЬ** *несов. см.* **поме́тить**

**ПОМЕ́ШАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** хыялый, аҡылынан яҙған; **поме́шанный челове́к** аҡылынан яҙған кеше; **стать поме́шанным** хыялый булыу **2.** *на ком-чём*; *перен.*, *разг.* хыялый булған, һаташҡан, ныҡ бирелгән; **поме́шанный на футбо́ле** футбол менән хыялый булған **3.** *в знач. сущ.* **поме́шанный** *м* и **поме́шанная** *ж* хыялый кеше; **он хо́дит как поме́шанный** ул хыялый кеше кеүек йөрөй

**ПОМЕША́ТЕЛЬСТВО** *с* хыялыйлыҡ, аҡылдан яҙыу

**ПОМЕША́ТЬ I** *сов. кому-чему см.* **меша́ть** I

**ПОМЕША́ТЬ II** *сов. что* болғау, бутау; **помеша́ть ка́шу** бутҡаны болғау

**ПОМЕША́ТЬСЯ** *сов.* **1.** хыялыйланыу, аҡылға еңеләйеү **2.** *на ком-чём*; *перен.*, *разг.* һаташыу, бик ныҡ мауығыу, әүәҫләнеп китеү; **помеша́ться на му́зыке** музыкаға әүәҫләнеп китеү

**ПОМЕ́ШИВАТЬ** *несов. что* и *без доп.* болғаҡылау, буташтырыу

**ПОМЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **помести́ть**

**ПОМЕЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **помести́ться 2.** (*находиться*) урынлашыу; **музе́й помеща́ется ря́дом с на́шим до́мом** музей беҙ торған йортҡа йәнәш урынлашҡан **3.** *страд. от* **помеща́ть**

**ПОМЕЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **помести́ть** – **помеща́ть**; **помеще́ние статьи́ в газе́ту** мәҡәләне гәзиткә урынлаштырыу **2.** бина, йорт; **жило́е помеще́ние** торлаҡ йорт

**ПОМЕ́ЩИК** *м* алпауыт

**ПОМЕ́ЩИЦА** *ж* **1.** (*владелица поместья*) алпауыт (ҡатын) **2.** *разг.* (*жена помещика*) алпауыт ҡатыны

**ПОМЕ́ЩИЧИЙ,** -ья, -ье алпауыт ...ы; **поме́щичья земля́** алпауыт ере

**ПОМИДО́Р** *м* помидор; **сала́т из помидо́ров** помидор салаты; **маринова́ть помидо́ры** помидор маринадлау

**ПОМИДО́РНЫЙ,** -ая, -ое помидор ...ы; **помидо́рная расса́да** помидор үрсетмәһе

**ПОМИ́ЛОВАНИЕ** *с* ярлыҡау, кисереү; **про́сьба о поми́ловании** кисереүҙе үтенеү, ярлыҡау һорау

**ПОМИ́ЛОВАТЬ** *сов. кого* **1.** *офиц.* кисереү, ярлыҡау, азат итеү; **поми́ловать престу́пника** енәйәтсене ярлыҡау **2.** *повел.* **поми́луй(те)**; *разг.* туҡта(ғыҙ) әле; нишләп улай булһын, ти

**ПОМИ́МО** *предлог с род. п.* (*минуя, кроме*) -дан/-дән башҡа, -дан/-дән тыш, -һыҙ/-һеҙ; **поми́мо его́ жела́ния** уның теләгенән тыш; **э́то соверши́лось поми́мо меня́** был минән башҡа эшләнгән ♦ **поми́мо всего́ про́чего** быларҙың бөтәһенән башҡа

**ПОМИ́Н** *м см.* **помина́ть** ♦ **и в поми́не нет** *кого-чего* булғаны ла юҡ; **лёгок на поми́не** *кто см.* **лёгкий**

**ПОМИНА́ТЬ** *несов. кого, о ком* үлгән кешене иҫкә алыу, иҫкә алыу йолаһын атҡарыу ♦ **помина́ть добро́м** маҡтап иҫкә алыу; **не помина́йте ли́хом** *см.* **ли́хо**; **помина́й как зва́ли** елдәр иҫкән, эҙе лә ҡалмаған

**ПОМИ́НКИ** *только мн.* үлгән кешене иҫкә алыу мәжлесе; **спра́вить поми́нки** үлгән кешене иҫкә алыу мәжлесе ойоштороу

**ПОМИНУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое минутлап; **помину́тная пла́та за телефо́нные перегово́ры** телефонда һөйләшкән өсөн минутлап түләү

**ПОМИРА́ТЬ** *несов. см.* **помере́ть** ♦ **помира́ть со́ смеху** эс (һын) ҡатып көләү

**ПОМИРИ́ТЬ** *сов. кого-что* килештереү, яраштырыу, татыулаштырыу

**ПОМИРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *см.* **мири́ться** 1; **2.** *с чем см.* **примири́ться**

**ПО́МНИТЬ** *несов. кого-что, о ком-чём, про кого-что* иҫләү, хәтерләү, иҫтә (хәтерҙә) тотоу, онотмау; **по́мнить друзе́й** дуҫтарҙы онотмау; **по́мнить о своём обеща́нии** вәғәҙәңде иҫтә тотоу ♦ **не по́мнить себя́** онотолоп китеү

**ПО́МНИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*сохраняться в памяти*) иҫтә (хәтерҙә) ҡалыу, иҫтә (хәтерҙә) булыу, онотмау **2.** *в 3 л. ед. ч. наст. вр.* **по́мнится** *в знач. вводн. сл.* иҫемдә, хәтеремдә, онотмаһам; **по́мнится, э́то бы́ло вчера́** иҫемдә, был хәл кисә булғайны; **наско́лько мне по́мнится** әгәр онотмаһам

**ПОМНО́ГУ** *нареч.*; *разг.* күпләп, күп, мул, күп (мул) итеп; **всего́ бы́ло помно́гу** бары ла мул булды

**ПОМНО́ЖИТЬ** *сов. что, на что* ҡабатлау; **помно́жить два на де́сять** икене унға ҡабатлау

**ПОМОГА́ТЬ** *несов. см.* **помо́чь**

**ПОМО́И** *только мн.* йыуынты; **вы́лить помо́и** йыуынтыны түгеү

**ПОМО́ЙКА** *ж* йыуынты соҡоро, сүп-сар соҡоро; **вы́бросить на помо́йку** сүп-сар соҡорона сығарып ташлау

**ПОМО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое йыуынты (һыу) ...ы; **помо́йное ведро́** йыуынты һыу биҙрәһе

**ПОМО́Л** *м* **1.** (он) тартыу; **пла́та за помо́л** он тартҡан өсөн түләү **2.** (*качество размельчения зерна*) тартылған он; **мука́ ме́лкого помо́ла** ваҡ тартылған он

**ПОМО́ЛВИТЬ** *сов. кого*; *уст.* кәләш әйттереү, ҡыҙ йәрәшеү, йәрәштереү; **помо́лвить молоды́х** йәштәрҙе йәрәштереү

**ПОМО́ЛВКА** *ж*; *уст. см.* **помо́лвить**

**ПОМОЛИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **моли́ться** 1

**ПОМОЛОДЕ́ТЬ** *сов.* йәшәреү, йәшәреп китеү

**ПОМОЛОДИ́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* йәшәртеү, йәшәртә төшөү

**ПОМОЛОТИ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* ашлыҡ һуғыу (һуғып алыу); **помолоти́л день и уста́л** бер көн ашлыҡ һуҡты ла арыны

**ПОМОЛО́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*молоть некоторое время*) тартып (тарттырып) алыу **2.** *что, чего*; *разг.* (*смолоть некоторое количество*) әҙерәк (бер аҙ) тартыу (тарттырыу)

**ПОМОЛЧА́ТЬ** *сов.* тымып (өндәшмәй) тороу; **помолча́ть не́сколько мину́т** бер нисә минут өндәшмәй тороу

**ПОМО́ЛЬЩИК** *м* он тарттырыусы

**ПОМОРГА́ТЬ** *сов. чем* и *без доп.* күҙ ҡыҫҡылау

**ПОМОРО́ЗИТЬ** *сов. что*; *разг.* өшөтөү, туңдырыу; **поморо́зить цветы́** сәскәне өшөтөп ҡуйыу

**ПОМО́РЩИТЬ** *сов. что* йыйырыу, сырыштырыу, йыйырып (сырыштырып) алыу; **помо́рщить лоб** маңлайҙы йыйырып алыу

**ПОМО́РЩИТЬСЯ** *сов.* сырылыу, сытырайыу, сырай һытыу; **помо́рщиться от бо́ли** һыҙланыуҙан сытырайыу

**ПОМО́РЫ** *мн.* поморҙар (*Аҡ һәм Баренц диңгеҙҙәренең яр буйҙарында йәшәүселәр*) // *ед.* **помо́р** *м* помор ир-аты; **помо́рка** *ж* помор ҡатын-ҡыҙы

**ПОМО́РЬЕ** *с* диңгеҙ буйы

**ПОМО́СТ** *м* түшәмә, таҡта майҙансыҡ; **взойти́ на помо́ст** таҡта майҙансыҡҡа күтәрелеү

**ПО́МОЧИ** *мн.* **1.** ҡайыш, таҫма (*берәй нәмәне аҫыу, тотоп тороу һ.б. өсөн*) **2.** *см.* **подтя́жки** ♦ **ходи́ть (быть) на по́мочах** *у кого* кеше теҙгенендә һөйрәлеү, кеше ҡурайына бейеү

**ПОМОЧИ́ТЬ** *сов. что* сылатыу, еүешләү; **помочи́ть во́лосы** сәсте сылатыу

**ПОМОЧИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һейеү, һейеп алыу, кесе ярау итеү; (*о скоте*) һарыу

**ПО́МОЧЬ** *ж* өмә; **организова́ть по́мочь** өмә ойоштороу; **уча́ствовать в по́мочи** өмәлә ҡатнашыу

**ПОМО́ЧЬ** *сов. кому-чему* **1.** ярҙам итеү, булышыу; **помо́чь в рабо́те** эштә булышыу; **помо́чь сове́том** кәңәш менән ярҙам итеү; **помо́чь нужда́ющимся** мохтаждарға ярҙам итеү **2.** *без*

*доп.* ярҙам итеү, файҙаһы тейеү; **лека́рство помогло́ больно́му** дарыуҙың ауырыуға файҙаһы тейҙе

**ПОМО́ЩНИК** *м* **1.** ярҙамсы, булышсы; **он мне помо́щник во всех дела́х** ул миңә бөтә эштә лә булышсы **2.** ярҙамсы; **помо́щник машини́ста** машинист ярҙамсыһы

**ПОМО́ЩНИЦА** *ж* ярҙамсы, булышсы

**ПО́МОЩЬ** *ж* ярҙам, булышлыҡ; **материа́льная по́мощь** матди ярҙам; **оказа́ть по́мощь** ярҙам күрһәтеү; **позва́ть на по́мощь** ярҙамға саҡырыу; **медици́нская по́мощь** медицина ярҙамы ♦ **с по́мощью**; **при по́мощи** *предлог с род. п.* ярҙамы менән, ярҙамында

**ПО́МПА I** *ж* яһалма (тышҡы) тантана (*кешеләрҙе аптыратыу өсөн*)

**ПО́МПА II** *ж* (*насос*) помпа

**ПОМПЕ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое үтә тантаналы; **помпе́зный приём** үтә тантаналы ҡаршы алыу

**ПОМПО́Н** *м* тумалаҡ суҡ (*баш кейемендә йәки туфлиҙарҙа*); **шля́па с помпо́ном** тумалаҡ суҡлы эшләпә

**ПОМРАЧЕ́НИЕ** *с см.* **помрачи́ться**; **помраче́ние созна́ния** аң томаланыуы ♦ **ума́ (уму́) помраче́нье** ғәжәп итерлек, хайран ҡалырлыҡ

**ПОМРАЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *уст.* (*потемнеть*) ҡараңғыланыу **2.** *перен.* (*стать мрачным — о глазах, лице и т.п.*) ҡараңғыланыу, моңһоуланыу (*күҙгә, йөҙгә һ.б. ҡарата*) **3.** (*помутиться — о сознании, мыслях и т.п.*) томаланыу, буталаныу; **его́ рассу́док помрачи́лся** уның аҡылы буталанды

**ПОМРАЧНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*о погоде*) ҡараңғыланып (бөләңгертләнеп) китеү **2.** (*о человеке*) һөмһөрө ҡойолоу, сырай ҡараңғыланыу

**ПОМУТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** буръяҡлау, болғансыҡлау; **помути́ть во́ду** һыуҙы болғансыҡлау **2.** *перен.* (*помрачить сознание, разум*) томалау; **помути́ть рассу́док** аҡылды томалау

**ПОМУТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** буръяҡланыу, болғансыҡланыу; **о́зеро помути́лось** күл буръяҡланды **2.** *перен.* (*о сознании, разуме*) томаланыу, буталаныу ♦ **помути́ться умо́м** аҡылдан яҙыу; **в глаза́х помути́лось** күҙ алды томаланып китте

**ПОМУТНЕ́НИЕ** *с см.* **помутне́ть**; **помутне́ние раство́ра** иретмәнең буръяҡланыуы; **помутне́ние рогови́цы** күҙ мөгөҙсәһенең тоноҡланыуы

**ПОМУТНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** болғансыҡланыу, буръяҡланыу, болғансыҡлана (буръяҡлана) төшөү; **вода́ помутне́ла** һыу болғансыҡланды **2.** *перен.* (*о сознании, разуме*) томаланыу, буталаныу, ҡараңғыланыу **3.** (*показаться мутным, неясным*) тоноҡланыу, тоноҡланып күренеү; **глаза́ помутне́ли** күҙҙәр тоноҡланды

**ПОМУ́ЧАТЬ** *сов.*; *прост. см.* **пому́чить**

**ПОМУ́ЧАТЬСЯ** *сов.*; *прост. см.* **пому́читься**

**ПОМУ́ЧИТЬ** *сов. кого* ғазаплау, интектереү, ғазаплап (ыҙалатып, интектереп) алыу

**ПОМУ́ЧИТЬСЯ** *сов.* бер аҙ ыҙаланыу (интегеү, ғазапланыу), ыҙаланып (интегеп, ғазапланып) алыу

**ПОМЧА́ТЬ** *сов. кого-что* и *без доп.* саптырып (елдереп) сығып китеү; **ло́шади помча́ли** аттар елдереп сығып китте

**ПОМЧА́ТЬСЯ** *сов.* сабыу, саптырыу, елдереү, саптырып (сабып, елдереп) китеү; **ло́шади помча́лись по доро́ге** аттар юлдан елдереп китте; **помча́ться за до́ктором** табип саҡырырға сабып сығып китеү

**ПОМЫКА́ТЬ** *несов. кем*; *разг.* йәберләү, көн күрһәтмәү, көн (ирек) бирмәү

**ПО́МЫСЕЛ** *м* уй, теләк, ниәт; **благи́е по́мыслы** изге ниәттәр; **све́тлые по́мыслы** якты уйҙар

**ПОМЫ́СЛИТЬ** *сов. о ком-чём* уйлау, ниәтләү, уйлап ҡарау, ниәт итеү

**ПОМЫ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг. см.* **вы́мыть** 1

**ПОМЫ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **вы́мыться**

**ПОМЫШЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **помы́слить**

**ПОМЯНУ́ТЬ** *сов. см.* **помина́ть**; **помяну́ть добро́м** яҡшы яҡ менән иҫкә алыу ♦ **помяни́(те) моё сло́во** мин әйткәйне тиерһең (тиерһегеҙ)

**ПОМЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **помя́ть** **2.** *прил.*; *разг.* таушалған; **помя́тая посте́ль** таушалған түшәк **3.** *прил.*; *перен., разг.* таушалған, йонсоған; **помя́тый вид** йонсоған ҡиәфәт

**ПОМЯ́ТЬ** *сов. что* **1.** бер аҙ таушалдырыу (бөгәрләү, тәпәрләү, бөтәрләү); **помя́ть оде́жду** кейемде бер аҙ тәпәрләү **2.** *разг.* (*измять всё, многое*) тапау, иҙеү, тапап (иҙеп) бөтөрөү; **помя́ть траву́** үләнде тапап бөтөрөү

**ПОМЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** бер аҙ таушалыу (бөгәрләнеү, тәпәрләнеү, бөтәрләнеү), таушалыңҡырау, бөгәрләнеңкерәү, тәпәрләнеңкерәү, бөтәрләнеңкерәү; **пла́тье помя́лось** күлдәк тәпәрләнеңкерәгән **2.** (*помедлить с чем-л.*) икеләнеп (ыҡ-мыҡ килеп) тороу

**ПОНАДЕ́ЯТЬСЯ** *сов. на кого-что, с неопр.* и *с союзом "что"* ышаныу, өмөтләнеү, ышанып (өмөтләнеп) тороу; **мы напра́сно понаде́ялись на него́** беҙ юҡҡа уға ышанып торғанбыҙ

**ПОНА́ДОБИТЬСЯ** *сов.* кәрәк булыу, кәрәгеү; **э́та кни́га мне не ско́ро пона́добится** был китап миңә тиҙ генә кәрәк булмаҫ

**ПОНАЕ́ХАТЬ** *сов.*; *разг.* килеп тулыу; **понае́хало мно́го госте́й** бик күп ҡунаҡ килеп тулды

**ПОНАПРА́СНУ** *нареч.*; *разг.* бушҡа, юҡҡа, заяға, әрәмгә, файҙаһыҙға; **понапра́сну волнова́ться** юҡҡа борсолоу

**ПОНАСЛЫ́ШКЕ** *нареч.*; *разг.* ишетеп; **знать то́лько понаслы́шке** ишетеп кенә белеү

**ПОНАЧА́ЛУ** *нареч.*; *разг.* башта, тәүҙә

**ПОНЕВО́ЛЕ** *нареч.* ирекһеҙҙән; **согласи́ться понево́ле** ирекһеҙҙән ризалашыу

**ПОНЕДЕ́ЛЬНИК** *м* дүшәмбе

**ПОНЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аҙналыҡ, аҙна һайын түләнә торған, аҙна һайын булған; **поне-**

**де́льный за́работок** аҙна һайын түләнә торған эш хаҡы

**ПОНЕМНО́ГУ** *нареч.* **1.** (*небольшими долями*) әҙләп, әҙ-әҙләп **2.** (*постепенно*) әкренләп, яйлап; **понемно́гу успоко́иться** әкренләп тынысланыу

**ПОНЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* (күтәреп) алып китеү (барыу), күтәреп барыу; **понести́ ребёнка домо́й** баланы күтәреп өйгә алып ҡайтыу; **понести́ чемода́н** сумаҙанды күтәреп барыу **2.** *кого-что* и *без доп.* алып ҡасыу, сабып сығып китеү; **ло́шади понесли́** аттар алып ҡасты **3.** *кого-что* (*о ветре, течении*) алып китеү (үҙе менән); **ве́тер понёс ло́дку** ел кәмәне алып китте **4.** *чем безл.* (*веять, тянуть*) иҫеү, өрөү, иҫә (өрә) башлау, еҫе килеү, (ел) сығыу, (һалҡын) килеү; **понесло́ хо́лодом** һалҡын ел иҫә башланы; **понесло́ табако́м** тәмәке еҫе килә **5.** *что*; *перен.* (*потерпеть, подвергнуться*) күреү, алыу, тартыу; **понести́ наказа́ние** яза алыу; **понести́ убы́ток** зыян күреү

**ПОНЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** йүгереү, сабыу, йүгереп (сабып) китеү; **понести́сь вдого́нку** артынан йүгереү; **ло́шади понесли́сь** аттар сабып китте **2.** (*распространяться*) таралыу, йәйелеү; **зву́ки понесли́сь по ле́су** тауыштар урман буйлап таралды

**ПО́НИ** *м нескл.* пони (*ваҡ тоҡом аты*)

**ПОНИЖА́ТЬ** *несов. см.* **пони́зить**

**ПОНИЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пони́зиться** **2.** *страд. от* **понижа́ть**

**ПОНИЖЕ́НИЕ** *с см.* **пони́зить — понижа́ть, пони́зиться — понижа́ться**; **пониже́ние температу́ры** температура төшөү

**ПОНИ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **пони́зить** **2.** *прил.* түбән, кәм; **пони́женная температу́ра** түбән температура; **пони́женные но́рмы** кәм нормалар **3.** *прил.*; *перен.* баҫынҡы, төшөнкө; **пони́женное настрое́ние** төшөнкө күңел

**ПОНИ́ЗИТЬ** *сов.* **1.** *что* тәпәшәйтеү, түбәнәйтеү; **пони́зить давле́ние** баҫымды түбәнәйтеү **2.** *что* төшөрөү, кәметеү, түбәнәйтеү; **пони́зить ско́рость** тиҙлекте кәметеү; **пони́зить це́ны** хаҡтарҙы кәметеү; **пони́зить напряже́ние то́ка** токтың көсөргәнешен кәметеү; **пони́зить ка́чество проду́кции** етештерелгән әйберҙең сифатын түбәнәйтеү **3.** *кого*; *разг.* (*в должности*) түбәнәйтеү; **пони́зить по слу́жбе** хеҙмәт буйынса түбәнәйтеү ♦ **пони́зить го́лос (тон)** тауышты әкренәйтеү

**ПОНИ́ЗИТЬСЯ** *сов.* **1.** тәпәшәйеү, түбәнәйеү **2.** төшөү, кәмеү; **мо́щность мото́ра пони́зилась** моторҙың ҡеүәте кәмене; **це́ны пони́зились** хаҡтар төшкән; **ско́рость пони́зилась** тиҙлек кәмене; **ка́чество проду́кции пони́зилось** етештерелгән әйберҙең сифаты түбәнәйҙе **3.** (*о голосе, звуках*) әкренәйеү, баҫыла төшөү; **го́лос пони́зился** тауыш баҫыла төштө

**ПО́НИЗУ** *нареч.* **1.** (*низко*) түбәндән, аҫтан, ер өҫтөнән; **ве́тер гнал облака́ по́низу** ел болоттарҙы түбәндән ҡыуҙы **2.** (*внизу*) түбәндә, аҫта; **зве́ри таи́лись по́низу** йәнлектәр түбәндә йәшеренде

**ПОНИКА́ТЬ** *несов. см.* **пони́кнуть**

**ПОНИ́КНУТЬ** *сов.* **1.** әйелеү, һалыныу, әйеләп (һалынып) төшөү, әйеү, һалындырыу; **коло́сья пшени́цы пони́кли** бойҙай башаҡтары әйелеп төшкән; **пони́кнуть голово́й** башты һалындырыу **2.** *перен.* (*впасть в уныние*) күңел ҡырылыу, кәйеф китеү

**ПОНИМА́НИЕ** *с* аңлау, төшөнөү; **понима́ние зако́нов приро́ды** тәбиғәт закондарын аңлау; **тру́дная для понима́ния те́ма** аңлау өсөн ауыр тема

**ПОНИМА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **поня́ть** **2.** *что, в чём* аңлау, белеү; **хорошо́ понима́ть му́зыку** музыканы яҡшы аңлау; **понима́ть в иску́сстве** сәнғәтте аңлау ♦ **вот э́то я понима́ю!** бына быныһы шәп!, бына быны әйтһәң дә ярай!; **понима́ешь (ли)**; **понима́ете (ли)** *в знач. вводн. сл.* беләһеңме, беләһегеҙме

**ПОНОЖО́ВЩИНА** *ж*; *разг.* бысаҡлашыу, бысаҡ менән һуғышыу, бысаҡҡа килешеү

**ПОНОМА́РЬ** *м* пономарь

**ПОНО́С** *м* эс китеү; **му́читься от поно́са** эс китеп ыҙалау

**ПОНОСИ́ТЬ I** *сов.* **1.** *кого* бер аҙ күтәреп (алып, тотоп) йөрөтөү; **поноси́ть ребёнка на рука́х** баланы бер аҙ ҡулда күтәреп йөрөтөү **2.** *что* кейә биреү, кейеү; **поноси́ть ста́рое пальто́** иҫке пальтоны кейә биреү

**ПОНОСИ́ТЬ II** *несов. кого-что* (*ругать*) ҡаты тиргәү, һүгеп әрләү

**ПОНО́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **поноси́ть** I; **2.** *прил.* кейелгән, иҫке; **поно́шенная оде́жда** кейелгән кейем

**ПОНРА́ВИТЬСЯ** *сов. см.* **нра́виться**

**ПОНТО́Н** *м* понтон (**1.** *кәмәләр өҫтөнә һалынған күпер* **2.** *батҡан карапты күтәртә торған эсе ҡыуыш ҡулайлама*)

**ПОНТО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** понтон ...ы; **понто́нный парк** понтон паркы **2.** понтонлы; **понто́нный мост** понтонлы күпер

**ПОНУДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мәжбүри; **понуди́тельные ме́ры** мәжбүри саралар ♦ **понуди́тельный зало́г** *грам.* йөкмәтеү йүнәлеше

**ПОНУ́ДИТЬ** *сов. кого-что*; *книжн.* мәжбүр итеү, көсләп (ирекһеҙләп) ҡушыу

**ПОНУЖДА́ТЬ** *несов. см.* **пону́дить**

**ПОНУЖДЕ́НИЕ** *с см.* **пону́дить — понужда́ть**

**ПОНУКА́НИЕ** *с см.* **понука́ть**

**ПОНУКА́ТЬ** *несов. кого* **1.** налау, на-на тип ҡыуыу; **понука́ть ло́шадь** атты на-на тип ҡыуыу **2.** *перен., разг.* (*торопить*) әйҙәләү, ҡабаландырыу

**ПОНУ́РИТЬ: пону́рить го́лову** башты эйеү

**ПОНУ́РЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*унылый*) бойоҡ, төшөнкө; **пону́рый вид** төшөнкө ҡиәфәт **2.** (*уныло опущенный*) һалынҡы, түбән һалынған (эйелгән); **пону́рая голова́** түбән эйелгән баш

**ПО́НЧИК** *м* пончик, сырлама (*майҙа бешерелгән бәләкәй ҡабартма*)

**ПОНЫ́НЕ** *нареч.* әлегәсә, бөгөнгәсә; **обы́чаи сохрани́лись и поны́не** йолалар әлегәсә һаҡланып ҡалған

**ПОНЮ́ХАТЬ** *сов. что, чего* еҫкәү, еҫкәп ҡарау; **поню́хать табаку́** тәмәке еҫкәү

**ПОНЮ́ШКА** *ж*; *разг.* бер семтем (еҫкәрлек) тәмәке ♦ **ни за понюшку табаку́ (пропа́сть, поги́бнуть)** бер ҙә юҡҡа әрәм булыу

**ПОНЯ́ТИЕ** *с* **1.** төшөнсә; **поня́тие сто́имости** ҡиммәт төшөнсәһе **2.** (*представление о чём-л.*) мәғлүмәт, аң, белеү, төшөнсә; **име́ть поня́тие** *о чём-л. нимәлер тураһында* мәғлүмәтле булыу; **поня́тие о предме́те** нәмә тураһында төшөнсә; **не име́ть ни мале́йшего поня́тия** һис ни белмәү **3.** *разг.* (*мнение*) уй, фекер

**ПОНЯ́ТЛИВОСТЬ** *ж* тиҙ төшөнөү (аңлаусанлыҡ), белеклелек, зирәклек; **поня́тливость ребёнка** баланың зирәклеге

**ПОНЯ́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое тиҙ төшөнөүсән (аңлаусан), белекле, зирәк; **поня́тливый челове́к** белекле кеше

**ПОНЯ́ТНО 1.** *нареч.* аңлайышлы (итеп); **излага́ть поня́тно** аңлайышлы итеп һөйләп биреү **2.** *в знач. вводн. сл.*; *разг.* (*конечно*) билдәле, әлбиттә; **он, поня́тно, не всё сказа́л** ул, әлбиттә, бөтәһен дә әйтмәне **3.** *кому в знач. сказ.*, *безл.* аңлашыла; **мне поня́тно** миңә аңлашыла

**ПОНЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*ясный*, *вразумительный*) аңлайышлы, аңларлыҡ, төшөнөрлөк; **поня́тный отве́т** аңлайышлы яуап **2.** (*объяснимый*) урынлы, нигеҙле; **поня́тная про́сьба** урынлы үтенес ♦ **поня́тное де́ло** *в знач. вводн. сл.* әлбиттә

**ПОНЯТО́Й** *м*; *юр.* бүнәтәй; **пригласи́ть понят́ых** бүнәтәйҙәр саҡырыу

**ПОНЯ́ТЬ** *сов. кого-что* аңлау, төшөнөү, аңлап (төшөнөп) алыу; **поня́ть ход реше́ния зада́чи** мәсьәләнең сиселеш юлын төшөнөп алыу; **они́ по́няли друг дру́га с полусло́ва** улар бер-береһен ярты һүҙҙән аңлап алды ♦ **дать поня́ть** аңғартып ҡуйыу

**ПООБЕ́ДАТЬ** *сов. см.* **обе́дать**

**ПООБЕЩА́ТЬ** *сов. см.* **обеща́ть** 1; **пообеща́ть писа́ть** яҙырға вәғәҙә биреү

**ПО́ОДАЛЬ** *нареч.* арыраҡ; **река́ протека́ет по́одаль** йылға арыраҡ аға

**ПООДИНО́ЧКЕ** *нареч.* берәмләп; **приглаша́ть поодино́чке** берәмләп саҡырыу

**ПООТСТА́ТЬ** *сов.*; *разг.* бер аҙ артта ҡалыу

**ПООЧЕРЁДНЫЙ,** -ая, -ое сиратлап, сиратлы; **поочерёдный карау́л** сиратлы ҡарауыл

**ПООЩРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **поощри́ть 2.** дәртләндереү; **ме́ры поощре́ния** дәртләндереү саралары

**ПООЩРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое дәртләндергес, дәртләндереү, дәртләндерә (ҡыҙыҡһындыра) торған; **поощри́тельная пре́мия** дәртләндереү премияһы

**ПООЩРИ́ТЬ** *сов. см.* **поощря́ть**

**ПООЩРЯ́ТЬ** *несов. кого-что* дәртләндереү, ҡыҙыҡһындырыу; **поощря́ть рабо́тников** хеҙмәткәрҙәрҙе дәртләндереү

**ПОП I** *м*; *разг.* поп

**ПОП II** *м*; *разг.* бура ♦ **поста́вить на попа́** баҫтырып (үрә) ҡуйыу

**ПОПАДА́НИЕ** *с см.* **попада́ть** 1, 2; **попада́ние пу́ли в цель** пуляның сәпкә тейеүе; **прямо́е попада́ние** тура тейҙереү

**ПОПА́ДАТЬ** *сов.* **1.** ҡойолоп төшөү, төшөп бөтөү; **с я́блони попа́дали я́блоки** алмағастан алмалар ҡойолоп төштө **2.** (бер-бер артлы) йығылыу, йығылып бөтөү; **мно́гие попа́дали в о́бморок** күптәр һуштан яҙып йығылды

**ПОПАДА́ТЬ** *несов. см.* **попа́сть**

**ПОПАДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **попа́сться**

**ПОПАДЬЯ́** *ж*; *разг.* поп ҡатыны

**ПОПА́РИТЬСЯ** *сов.* сабыныу, сабынып алыу

**ПОПА́РНО** *нареч.* ҡушарлап, икешәрләп; **де́ти шли попа́рно** балалар ҡушарлап бара ине

**ПОПА́СТЬ** *сов.* **1.** *в кого-что*, *чем* (*попасть в цель — о пуле, о чём-л. брошенном и т.п.*) тейеү, тейҙереү; (*просунуть*) индереү, кертеү, тығыу; **пу́ля попа́ла в цель** пуля сәпкә тейҙе; **попа́сть ка́мнем в окно́** таш менән тәҙрәгә тейҙереү; **попа́сть ного́й в стре́мя** аяҡты өҙәңгегә тығыу; **попа́сть ключо́м в замо́чную сква́жину** асҡысты йоҙаҡ тишегенә индереү; **попа́сть ни́ткой в иго́лку** епте энә күҙәүенә индереү **2.** *во что*, *чем* (*неловким движением угодить куда-л.*) тап булыу, тура килеү, барып төшөү; **попа́сть в грязь** бысраҡҡа тура килеү **3.** *куда* (*очутиться*) эләгеү, барып (килеп) эләгеү (сығыу); **попа́сть в незнако́мый го́род** таныш булмаған ҡалаға барып сығыу; **попа́сть на пра́здник** байрамға барып эләгеү **4.** *во что*, *подо что* (*оказаться*) эләгеү, ҡалыу, тарыу; **попа́сть под дождь** ямғыр аҫтында ҡалыу; **попа́сть в лову́шку** тоҙаҡҡа эләгеү; **попа́сть в беду́** бәләгә тарыу **5.** *во что*, *на что* (*оказаться назначенным*, *принятым куда-л.*) эләгеү, инеү, кереү; **попа́сть в институ́т** институтҡа инеү; **попа́сть во флот** флотҡа эләгеү **6.** *кому безл.*; *разг.* эләгеү, төшөү; **тебе́ за э́то попадёт** һиңә бының өсөн эләгер **7.** *в прош. вр.* **попа́ло**; *неодобр.*: **ночева́ть где попа́ло** теләһә ҡайҙа йоҡлау; **есть что попа́ло** нимә тура килә, шуны ашау; **как попа́ло** нисек етте шулай, теләһә нисек; **кто попа́ло** теләһә кем; кем тура килә, шул; **куда́ попа́ло** теләһә ҡайҙа; ҡайҙа етте, шунда ♦ **попа́сть впроса́к** *см.* **впроса́к**; **попа́сть в ко́гти** *см.* **ко́готь**; **попа́сть в ру́ки** ҡулы-

на эләгеү; **попа́сть па́льцем в не́бо** яҙа әйтеү, бик ныҡ яңылышыу

**ПОПА́СТЬСЯ** *сов.* **1.** эләгеү, тотолоу; **попа́сться в капка́н** ҡапҡанға эләгеү; **попа́сться на кра́же** урлағанда тотолоу **2.** *кому*; *разг.* осрау, тап булыу; **попа́сться навстре́чу** ҡаршы осрау **3.** *кому* ҡулға төшөү (эләгеү); **попа́лась хоро́шая кни́га** яҡшы китап ҡулға эләкте ♦ **попа́сться на глаза́** *см.* **глаз**; **попа́сться на у́дочку** *см.* **у́дочка**

**ПОПА́ХИВАТЬ** *несов. чем* и *без доп.*; *разг.* еҫе килеү, еҫләнә башлау; **попа́хивает га́рью** көйөк еҫе килә; **ры́ба попа́хивает** балыҡ еҫләнә башлаған

**ПОПЕРЁК** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* арҡыры, арҡырыға; **распили́ть бревно́ поперёк** бүрәнәне арҡырыға бысыу **2.** *нареч.*; *перен.*, *разг.* ҡаршы, кирегә; **говори́ть поперёк** ҡаршы һөйләү **3.** *предлог с род. п.* арҡыры; **копа́ть транше́ю поперёк у́лицы** урам арҡыры соҡор ҡаҙыу ♦ **поперёк горла стать (встать и т.п.)** *см.* **го́рло**

**ПОПЕРЕМЕ́ННО** *нареч.* алмашлап, алмаштилмәш; **чита́ть попереме́нно** алмашлап уҡыу

**ПОПЕРЕ́ЧИНА** *ж* арҡыры ағас, арата; **попере́чина ле́стницы** баҫҡыс аратаһы; **попере́чина огражде́ния** кәртә аратаһы

**ПОПЕРЕ́ЧНИК** *м* иңе, арҡырыһы; **о́зеро киломе́тра четы́ре в попере́чнике** иңе дүрт километр тирәһе күл

**ПОПЕРЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое арҡыры; **в попере́чном разре́зе** арҡыры киҫелешендә; **попере́чная ли́ния** арҡыры һыҙыҡ ♦ **попере́чная пила́** арҡыры бысҡы

**ПОПЕРХНУ́ТЬСЯ** *сов.* сәсәү, сәсәп китеү; **поперхну́ться ча́ем** сәйгә сәсәү

**ПОПЕ́РЧИТЬ** и **ПОПЕРЧИ́ТЬ** *сов. что* (әҙерәк) борослау, (әҙерәк) борос һибеү

**ПОПЕ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* йырлап алыу

**ПОПЕЧЕ́НИЕ** *с* ҡарамаҡ, тәрбиәгә алыу, тәрбиәлә булыу, ҡайғыртыу; **оста́вить на попече́ние** *чьё-л. кемдеңдер* ҡарамағына ҡалдырыу

**ПОПЕЧИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПОПЕЧИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* **1.** (*опекун*) бағыусы, ҡарап үҫтереүсе, тәрбиә итеүсе **2.** попечитель (*революцияға тиклем Рәсәйҙә берәй тармаҡтың учреждениеларына етәкселек итеүсе*)

**ПОПЕЧИ́ТЕЛЬСТВО** *с* попечителлек, попечитель вазифаһы, бағыусылыҡ

**ПОПИВА́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *что* аҙлап эсеү, эсеү; **сиди́т, чаёк попива́ет** рәхәтләнеп сәй эсеп ултыра **2.** (*изредка выпивать*) эскеләү

**ПОПИРА́ТЬ** *несов. что*; *перен.* боҙоу, һанға һуҡмау; **попира́ть права́** *чьи-л. берәйһенең* хоҡуҡтарын һанға һуҡмау

**ПОПИСА́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* яҙғылап алыу; **хочу́ немно́го пописа́ть** бер аҙ яҙғылап алғым килә ♦ **ничего́ не попи́шешь** *разг.* бер ни ҙә эшләп булмай

**ПОПИ́СЫВАТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *разг.*, *ирон.* яҙғылау, яҙыштырыу; **он попи́сывает в газе́тах** ул гәзиткә яҙыштыра

**ПОПИ́ТЬ** *сов. что*, *чего* и *без доп.* бер аҙ эсеү, эсеп алыу; **попи́ть холо́дной воды́** һалҡын һыу эсеп алыу

**ПО́ПКА** *ж*; *разг.* (*ягодицы, обычно у ребёнка*) оса

**ПОПЛАВО́К** *м* **1.** ҡалҡыуыс; **поплаво́к у́дочки** ҡармаҡ ҡалҡыуысы; **поплаво́к сети́** ау ҡалҡыуысы; **поплаво́к гидросамолёта** гидросамолёт ҡалҡыуысы **2.** *разг.* йөҙгөс ресторан

**ПОПЛА́КАТЬ** *сов.* илап алыу

**ПО-ПЛАСТУ́НСКИ** *нареч.* түш менән шыуышыу

**ПОПЛАТИ́ТЬСЯ** *сов. чем* и *без доп.* язаһын күреү, кәрәген алыу, түләү; **поплати́ться за оши́бку** хата өсөн язаһын күреү

**ПОПЛЕВА́ТЬ** *сов.*; *разг.* төкөрөү, төкөрөп ҡуйыу

**ПОПЛЁВЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* төкөргөләү, төкөрөштөрөү

**ПОПЛЕСТИ́СЬ** *сов.*; *разг.* һөйрәлеп барыу (килеү)

**ПОПЛИ́Н** *м* поплин (*туҡыма*)

**ПОПЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** поплин ...ы; **попли́новый отре́з** поплин киҫәге **2.** поплин, поплиндан тегелгән; **попли́новое пла́тье** поплин күлдәк

**ПОПЛЫ́ТЬ** *сов.* йөҙә (аға) башлау, йөҙөп (ағып) китеү; **поплы́ть к бе́регу** ярға табан йөҙөп китеү; **плот поплы́л** һал ағып китте

**ПОПЛЯСА́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* бейеп алыу ♦ **ты у меня́ попля́шешь** мин һине бейетермен әле, ҡыҙған табаға баҫтырырмын

**ПОПО́ВСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* поп ...ы; **по́повский дом** поп йорто

**ПОПО́ЙКА** *ж*; *разг.* эскелек, эске мәжлесе

**ПОПОЛА́М** *нареч.* **1.** урталай, уртаға; **распили́ть бревно́ попола́м** бүрәнәне уртаға бысыу **2.** (*на паях*) уртаҡҡа; **купи́ть попола́м** *что-л. нимәлер* уртаҡҡа һатып алыу **3.** (*в смешении с чем-л.*) яртылаш; **молоко́ попола́м с водо́й** яртылаш һыу ҡушылған һөт

**ПО́ПОЛЗЕНЬ** *м* үрмәлсек турғай

**ПОПОЛЗНОВЕ́НИЕ** *с* йәшерен уй (ниәт), аҫтыртын ниәт

**ПОПОЛЗТИ́** *сов.* шыуышып (үрмәләп, имгәкләп) китеү

**ПОПОЛНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **попо́лнить** — **пополня́ть**, **попо́лниться** — **пополня́ться**; **пополне́ние запа́сов** һаҡламдарҙы тулыландырыу **2.** *воен.* өҫтәлмә ғәскәр; **на фронт при́было пополне́ние** фронтҡа өҫтәлмә ғәскәр килде

**ПОПОЛНЕ́ТЬ** *сов. см.* **полне́ть**

**ПОПО́ЛНИТЬ** *сов. что*, *чем* тулыландырыу, өҫтәү, арттырыу; **попо́лнить запа́сы продово́льствия** аҙыҡ һаҡламдарын тулыландырыу; **попо́лнить свои́ зна́ния** үҙ белемеңде арттырыу

**ПОПО́ЛНИТЬСЯ** *сов.* тулыланыу, артыу; **библиоте́ка попо́лнилась но́выми кни́гами** китапхана яңы китаптар менән тулыланды

**ПОПОЛНЯ́ТЬ** *несов. см.* **попо́лнить**

**ПОПОЛНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **попо́лниться** **2.** *страд. от* **пополня́ть**

**ПОПОЛУ́ДНИ** *нареч.* төш ауғас, төштән һуң; **в два часа́ пополу́дни** төштән һуң сәғәт икелә

**ПОПОЛУ́НОЧИ** *нареч.* төн уртаһы уҙғас, ярты төндән һуң; **в час пополу́ночи** ярты төндән һуң сәғәт берҙә

**ПОПО́МНИТЬ** *сов.*; *что* **1.** *разг.* (*не забыть*) иҫтә тотоу, онотмау **2.** *кому* иҫенә төшөрөү, алдына килтереү; **я тебе́ э́то попо́мню** мин быны иҫеңә төшөрөрмөн әле ♦ **попо́мни(те) моё сло́во** мин әйткәйне тиерһең (тиерһегеҙ)

**ПОПО́НА** *ж* ат япмаһы

**ПОПО́РТИТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** әҙерәк (бер аҙ) боҙоу (ватыу); **снаря́д попо́ртил сте́ну** снаряд стенаны бер аҙ ватҡан **2.** (*испортить всё, многое*) боҙоу, боҙоп (ватып) бөтөрөү; **попо́ртить все проду́кты** бөтә аҙыҡ-түлекте боҙоп бөтөрөү

**ПОПО́РТИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** әҙерәк (бер аҙ) боҙоу (ватыу); **я́блоко попо́ртилось** алма бер аҙ боҙолған **2.** (*испортить — о всём, многом*) боҙолоп (ватылып) бөтөү; **брёвна попо́ртятся, лёжа в коре́** ҡабығында ятып, бүрәнәләр боҙолоп бөтәсәк

**ПОПО́ТЧЕВАТЬ** *сов. см.* **по́тчевать**

**ПОПРАВИ́МЫЙ,** -ая, -ое төҙәтерлек, төҙәтә алырлыҡ; **э́та оши́бка ещё поправи́ма** был хата әле төҙәтерлек

**ПОПРА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*починить*) төҙәтеү; **попра́вить теле́гу** арбаны төҙәтеү **2.** *кого-что* (*устранить небольшие ошибки*) төҙәтеү, йүнәтеү, ипләү; **попра́вить рису́нок** рәсемде төҙәтеү **3.** *что* рәтләү, төҙәтеү, яҡшыртыу; **попра́вить дела́** эштәрҙе рәтләү; **попра́вить здоро́вье** сәләмәтлекте яҡшыртыу

**ПОПРА́ВИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*исправить свою ошибку*) әйткәнеңде төҙәтеү (*һөйләгәндә*); **докла́дчик оговори́лся и тут же попра́вился** докладсы яңылыш әйтеп ебәрҙе һәм шунда уҡ әйткәнен төҙәтте **2.** төҙәтенеү, үҙеңде ипкә килтереү; **попра́виться пе́ред зе́ркалом** көҙгө алдында төҙәтенеү **3.** (*улучшиться*) рәтләнеү, яҡшырыу, яҡшыланыу; **дела́ попра́вились** эштәр яҡшырҙы **4.** (*выздороветь*) төҙәлеү, һауығыу **5.** *разг.* (*пополнеть*) таҙарыу, көрәйеү

**ПОПРА́ВКА** *ж* **1.** *см.* **попра́вить — поправля́ть, попра́виться — поправля́ться** 3—5; **2.** (*дополнение, исправление*) төҙәтмә; **попра́вка к резолю́ции** резолюцияға (индерелгән) төҙәтмә

**ПОПРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **попра́вить**

**ПОПРАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **попра́виться** **2.** *страд. от* **поправля́ть**

**ПОПРА́ТЬ** *сов. см.* **попира́ть**

**ПО-ПРЕ́ЖНЕМУ** *нареч.* элеккесә, әүәлгесә

**ПОПРЁК** *м*; *разг.* шелтә, әр

**ПОПРЕКА́ТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* шелтәләү, әрләү

**ПОПРЕКНУ́ТЬ** *сов. см.* **попрека́ть**

**ПОПРИВЫ́КНУТЬ** *сов.*; *разг.* яйлап өйрәнеп (күнегеп) китеү, күнегә төшөү; **попривы́кнуть к но́вым усло́виям** яңы шарттарға күнегә төшөү

**ПО́ПРИЩЕ** *с*; *книжн.* майҙан, өлкә; **на по́прище просвеще́ния** мәғариф өлкәһендә

**ПОПРО́БОВАТЬ** *сов.* **1.** *см.* **про́бовать** **2.** *повел.* **попробу́й(те)**; *разг.* тейеп кенә ҡара(ғыҙ)

**ПОПРОСИ́ТЬ** *сов. см.* **проси́ть** 1—3

**ПОПРОСИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **проси́ться** 1, 2

**ПО́ПРОСТУ** *нареч.* **1.** ябай ғына итеп, тартынмайынса; **расскажи́те всё по́просту** барын да ябай ғына итеп һөйләгеҙ **2.** *в знач. усил. и огранич. частицы* (*просто-напросто*) ысынын (дөрөҫөн) әйткәндә; **его́ по́просту уво́лили** дөрөҫөн әйткәндә, уны эштән сығарҙылар

**ПОПРОША́ЙКА** *м* и *ж*; *разг.* **1.** (*нищий*) хәйерсе, теләнсе **2.** (*тот, кто выпрашивает что-л.*) һораныусы

**ПОПРОША́ЙНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** (*нищенствовать*) хәйерселәү, теләнселәү **2.** (*выпрашивать*) һораныу

**ПОПРОША́ЙНИЧЕСТВО** *с*; *разг.* **1.** (*нищенство*) хәйерселек, теләнселек **2.** (*надоедливое выпрашивание*) һораныу, һоранып йонсотоу

**ПОПРОЩА́ТЬСЯ** *сов. см.* **прости́ться**; **попроща́ться с жено́й** ҡатын менән хушлашыу

**ПОПРЫГУ́Н** *м* и **ПОПРЫГУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* ырғандаҡ, һикрәндәк

**ПОПРЫ́СКАТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что, чем* бөркөү; **попры́скать духа́ми** хушбуй бөркөү **2.** *без доп.* (*покрапать — о дожде*) һибәләү, һибәләп алыу

**ПОПРЫ́СКАТЬСЯ** *сов. чем*; *разг.* үҙенә бөркөү, һөртөнөү; **попры́скаться духа́ми** хушбуй һөртөнөү

**ПОПРЯ́ТАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* йәшереп ҡуйыу (бөтөрөү)

**ПОПРЯ́ТАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* йәшенеү, йәшенешеп бөтөү; **де́ти попря́тались от дождя́** балалар ямғырҙан йәшенешеп бөттө

**ПОПУГА́Й** *м* **1.** тутыйғош **2.** *перен.*, *разг.* попугай, тутыйғош (*башҡалар һүҙен ҡабатлаусы кеше*)

**ПОПУГА́ЙНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* тутыйғошланыу (*кемдән ни ишеткәнде ҡабатлау*)

**ПОПУГА́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* әҙерәк ҡурҡытыу, ҡурҡытып алыу

**ПОПУ́ДРИТЬ** *сов. кого-что* (әҙерәк) пудралау, пудра һөртөү

**ПОПУ́ДРИТЬСЯ** *сов.* (әҙерәк) пудраланыу, пудра һөртөнөү

**ПОПУЛЯРИЗА́ТОР** *м* популярлаштырыусы; **популяриза́тор но́вых иде́й** яңы идеяларҙы популярлаштырыусы

**ПОПУЛЯРИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **популяризи́ровать**

**ПОПУЛЯРИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* популярлаштырыу, популяр итеү, аңлатып биреү

**ПОПУЛЯРИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. см.* **популяризи́ровать**

**ПОПУЛЯ́РНОСТЬ** *ж* **1.** популярлыҡ, еңел аңлайышлылыҡ; **популя́рность изложе́ния** әйтелгән (яҙылған) һүҙҙең еңел аңлайышлылығы **2.** (*известность*) танылғанлыҡ, популярлыҡ, киң танылған булыу; **по́льзоваться популя́рностью** киң танылған булыу

**ПОПУЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** еңел, аңлайышлы, популяр; **кни́га напи́сана популя́рным языко́м** китап аңлайышлы тел менән яҙылған **2.** (киң) танылған, популяр; **популя́рный писа́тель** танылған яҙыусы

**ПОПУРРИ́** *с нескл.*; *муз.* попурри, теҙмә; **попурри́ из наро́дных мело́дий** халыҡ көйҙәренән теҙмә

**ПОПУСТИ́ТЕЛЬСТВО** *с* ирек (юл) ҡуйыу

**ПОПУСТИ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов. кому-чему кемгәләр-нимәгәләр* ирек (юл) ҡуйыу, уҙындырыу, буйлатыу

**ПО́ПУСТУ** *нареч.*; *разг.* юҡҡа, бушҡа, тиккә, заяға, ҡороға; **не тра́тить вре́мя по́пусту** юҡҡа ваҡыт әрәм итмәү

**ПОПУ́ТАТЬ** *сов. кого*; *разг.* ҡотортоу, аҙҙырыу ♦ **бес попу́тал** шайтан ҡотортто (*ҡылғанға үкенес белдереп әйтелә*)

**ПОПУ́ТНО** *нареч.* **1.** бер ыңғайҙан; **попу́тно зада́ть вопро́с** бер ыңғайҙан һорау биреү **2.** *разг.* юл айҡан, юл ыңғайы(нда); **зае́хать попу́тно** юл айҡан һуғылып сығыу

**ПОПУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*движущийся в одном направлении с кем-чем-л.*) ыңғай, юл айҡан, уңай, юл ыңғайына, бер юлдан бара торған, юл ыңғай осраған; **попу́тный ве́тер** ыңғай ел; **попу́тная маши́на** юл ыңғай осраған машина **2.** (*совершаемый одновременно с чем-л. основным*) (һүҙ) ыңғайында; **попу́тный вопро́с** һүҙ ыңғайында бирелгән һорау

**ПОПУ́ТЧИК** *м* и **ПОПУ́ТЧИЦА** *ж* **1.** юлдаш **2.** *перен.* эйәреүсе (*берәй сәйәси хәрәкәткә ваҡытлыса ҡушылған кеше*)

**ПОПЫТА́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* һынау, һынап ҡарау ♦ **попыта́ть сча́стья (сча́стье)** бәхетте һынап ҡарау

**ПОПЫТА́ТЬСЯ** *сов. с неопр.* тырышыу, тырышып (маташып) ҡарау; **попыта́йся сам реши́ть зада́чу** мәсьәләне үҙең сисергә тырышып ҡара

**ПОПЫ́ТКА** *ж*; *в разн. знач.* тырышыу, маташыу, уҡталыу; **тще́тные попы́тки** файҙаһыҙ маташыуҙар; **предприня́ть попы́тку** маташып ҡарау; **взять барье́р с пе́рвой попы́тки** барьерҙы беренсе уҡталыуҙа уҡ алыу ♦ **попы́тка не пы́тка** ятып ҡалғансы атып ҡал

**ПОПЫ́ХИВАТЬ** *несов.*; *разг.* пыхылдау, пых-пых килеү

**ПОПЯ́ТИТЬСЯ** *сов.* сигенеү, сигенә төшөү; **попя́титься наза́д** артҡа сигенеү

**ПОПЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое кире, артҡа табан ♦ **идти́ на попя́тный (на попя́тную)** үҙ һүҙенән кире ҡайтыу, һүҙендә тормау

**ПОРА́** *ж* **1.** ваҡыт, саҡ, мәл; **весе́нняя пора́** яҙ ваҡыты; **зи́мняя пора́** ҡышҡы мәл; **пора́ жа́твы** ураҡ мәле **2.** *кому в знач. сказ., безл.* ваҡыт; **пора́ на рабо́ту** эшкә барырға ваҡыт ♦ **в (са́мую) по́ру** үҙ ваҡытында; **в ту по́ру** ул саҡта; **до поры́, до вре́мени** ваҡыты еткәнсә; **до сих по́р**; **до́ сих пор**: 1) (*о времени*) әлегә тиклем, ошоға ҡәҙәр; **до сих по́р не знать** әлегә тиклем белмәү; 2) (*о месте*) ошо ергә тиклем; **до каки́х пор** ҡасанға тиклем; **до тех пор** шуға тиклем; **на пе́рвых пора́х** тәү башта; **с да́вних пор** әллә ҡасандан бире, күптән

**ПОРАБО́ТАТЬ** *сов.* эшләү, эшләп алыу

**ПОРАБОТИ́ТЕЛЬ** *м* ҡол итеүсе, иҙеүсе, ҡоллоҡҡа төшөрөүсе

**ПОРАБОТИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*лишить свободы*) иҙеү, ҡол итеү, ҡоллоҡҡа төшөрөү **2.** (*полностью подчинить себе*) үҙенә буйһондороу (бағындырыу)

**ПОРАБОЩА́ТЬ** *несов. см.* **поработи́ть**

**ПОРАБОЩЕ́НИЕ** *с* ҡоллоҡ, бойондороҡлоҡ; **находи́ться в порабоще́нии** бойондороҡлоҡта булыу

**ПОРАВНЯ́ТЬСЯ** *сов. с кем-чем* тигеҙләнеү, йәнәшләү, арттан килеп етеү

**ПОРА́ДОВАТЬ** *сов. кого-что* ҡыуандырыу, һөйөндөрөү, шатландырыу

**ПОРА́ДОВАТЬСЯ** *сов.* ҡыуаныу, һөйөнөү, шатланыу

**ПОРАЖА́ТЬ** *несов. см.* **порази́ть**

**ПОРАЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **порази́ться** **2.** *страд. от* **поража́ть**

**ПОРАЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **порази́ть** 1 — **поража́ть**; **пораже́ние це́ли** сәпкә тейҙереү **2.** еңелеү; **потерпе́ть пораже́ние** еңелеүгә дусар булыу **3.** (*повреждение*) зарарланыу; **пораже́ние зри́тельного не́рва** күреү нервыһының зарарланыуы ♦ **пораже́ние прав (в права́х)** *юр.* хоҡуҡтан мәхрүм итеү

**ПОРАЖЕ́НЧЕСТВО** *с* еңелеү яғында тороу (**1.** *һуғышта үҙ хөкүмәтенең еңелеүен күҙәткән сәйәсәт* **2.** *берәй идея, уй, эштең барып сығыуына икеләнеп ҡарау*)

**ПОРАЗИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое иҫ киткес, таң ҡалдырғыс, һоҡландырғыс; **порази́тельная красота́** һоҡландырғыс матурлыҡ; **порази́тельная па́мять** иҫ киткес хәтер

**ПОРАЗИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (атып) тейҙереү, емереү, зыян итеү; **порази́ть цель** сәпкә тейҙереү; **порази́ть снаря́дом танк** снаряд менән танкыға атып тейҙереү **2.** (*победить, разбить*)

тар-мар итеү; **порази́ть неприя́теля** дошманды тар-мар итеү **3.** зарарлау, зарар килтереү; **боле́знь порази́ла слух** ауырыу ҡолаҡҡа зарар килтергән **4.** (*изумить*) иҫте китереү, ғәжәпкә (таңға, хайранға) ҡалдырыу

**ПОРАЗИ́ТЬСЯ** *сов.* иҫ китеү, ғәжәпләнеү, таң (хайран) ҡалыу; **порази́ться изве́стию** хәбәргә иҫ китеү

**ПОРАЗМЫ́СЛИТЬ** *сов. о ком-чём, над чем* и *без доп.*; *разг.* төптән уйлау, ныҡлап фекер йөрөтөү

**ПОРА́НИТЬ** *сов. кого-что* (бер аҙ) яралау, йәрәхәтләү

**ПОРА́НИТЬСЯ** *сов.* (бер аҙ) яраланыу, йәрәхәтләнеү

**ПОРАСКИ́НУТЬ: пораски́нуть умо́м** *прост. см.* **раски́нуть**

**ПОРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **порасти́** 1

**ПОРАСТИ́** *сов.* **1.** *чем* баҫыу, ҡаплау; **тропи́нка поросла́ траво́й** һуҡмаҡты үлән баҫҡан **2.** (*прибавиться в росте*) үҫә биреү (төшөү), бер аҙ үҫеү

**ПОРВА́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* йыртыу, йыртып ташлау (ебәреү); (*нитку*) өҙөү; **порва́ть руба́шку** күлдәкте йыртыу; **порва́ть письмо́** хатты йыртып ташлау **2.** *перен.* өҙөү; **порва́ть отноше́ния** *с кем-л. кем менәндер* мөнәсәбәтте өҙөү; **порва́ть догово́р** килешеүҙе өҙөү

**ПОРВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *прям., перен.* өҙөлөү, йыртылыу; **ни́тка порвала́сь** еп өҙөлдө; **пальто́ порва́лось** пальто йыртылған; **го́лос порва́лся** тауыш өҙөлдө **2.** *перен.* (*об отношениях*) өҙөлөү; **связь порвала́сь** бәйләнеш өҙөлдө

**ПОРЕДЕ́ТЬ** *сов. см.* **реде́ть**

**ПОРЕ́З** *м* **1.** *см.* **поре́зать** 1, **поре́заться** **2.** (*рана*) яра, ҡырҡылған (киҫелгән) ер; **глубо́кий поре́з** тәрән яра

**ПОРЕ́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡырҡыу, киҫеү; **поре́зать ру́ку** ҡулды киҫеү **2.** *что, чего*; *разг.* ҡырҡыу, киҫеү, телеү, турау; **поре́зать мя́со** ит турау

**ПОРЕ́ЗАТЬСЯ** *сов.* ҡырҡылыу, киҫелеү, ҡырҡып (киҫеп) ебәреү; **поре́заться стекло́м** быялаға ҡырҡылыу

**ПОРЕ́Й** *м* ялпаҡ һуған

**ПОРЕКОМЕНДОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тәҡдим итеү; **порекомендова́ть рабо́тника** хеҙмәткәр тәҡдим итеү **2.** *что* и *с неопр.* кәңәш итеү (биреү); **порекомендова́ть проче́сть интере́сную кни́гу** ҡыҙыҡлы китапты уҡырға кәңәш биреү

**ПОРЕ́ЧЬЕ** *с* йылға буйы, үҙән буйы

**ПО́РИСТЫЙ,** -ая, -ое күҙәүле, күҙгәнәсле, күҙәнәкле; **по́ристая ко́жа** күҙгәнәсле тире; **по́ристый хлеб** күҙәнәкле икмәк; **по́ристый чугу́н** күҙәнәкле суйын

**ПОРИЦА́НИЕ** *с* шелтә; **вы́нести порица́ние** шелтә белдереү

**ПОРИЦА́ТЬ** *несов. кого-что* шелтәләү

**ПО́РКА I** *ж см.* **поро́ть** I; **по́рка пла́тья** күлдәк һүтеү

**ПО́РКА II** *ж*; *разг. см.* **поро́ть** II

**ПОРНОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое порнографик; **порнографи́ческий рома́н** порнографик роман

**ПОРНОГРА́ФИЯ** *ж* порнография (*енси мөнәсәбәтте һүрәтләүҙәге оятһыҙлыҡ*)

**ПО́РОВНУ** *нареч.* тигеҙләп, тигеҙ итеп; **раздели́ть по́ровну** тигеҙ итеп бүлеү

**ПОРО́Г** *м* **1.** *прям., перен.* тупһа; **высо́кий поро́г** бейек тупһа; **верну́ться к о́тчему поро́гу** атай тупһаһына әйләнеп ҡайтыу; **переступи́ть поро́г** тупһаны аша атлау **2.** һикәлтә; **поро́г на го́рной реке́** тау йылғаһындағы һикәлтә **3.** *чего*; *перен.* (*преддверие, граница*) алдында; **на поро́ге ва́жных собы́тий** мөһим ваҡиғалар алдында **4.** *спец.* (*наименьшая степень проявления чего-л.*) сик; **поро́г слы́шимости** ишетелеш сиге ♦ **на поро́ге** бына-бына була, бик тиҙҙән етә; **на поро́г не пуска́ть** *кого* тупһаға баҫтырмау

**ПОРО́ДА** *ж* **1.** тоҡом, нәҫел; **башки́рская поро́да лошаде́й** башҡорт тоҡомло аттар; **охо́тничья поро́да соба́к** һунар эттәре тоҡомо **2.** (*вид растений*) төр; **древе́сные поро́ды** ағас төрҙәре **3.** (*категория людей*) зат; **из богаты́рской поро́ды люде́й** баһадирҙар затынан **4.** (*минерал*) тоҡом; **го́рная поро́да** тау тоҡомо

**ПОРО́ДИСТЫЙ,** -ая, -ое яҡшы тоҡомло (нәҫелле); **поро́дистая ло́шадь** яҡшы тоҡомло ат

**ПОРОДИ́ТЬ** *сов. что*; *перен.* (*послужить причиной*) килтереп сығарыу, сәбәпсе булыу; **породи́ть недоразуме́ние** аңлашылмаусылыҡ килтереп сығарыу

**ПОРОДНИ́ТЬ** *сов. кого-что, с кем-чем* туғанлаштырыу, яҡынайтыу, туған итеү; **породни́ть чу́ждые друг дру́гу роды́** бер-береһенә сит ырыуҙарҙы туғанлаштырыу

**ПОРОДНИ́ТЬСЯ** *сов.* туғанлашыу, туған булыу

**ПОРОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **породи́ть**

**ПОРОЖДЕ́НИЕ** *с* тыуҙырған нәмә, нигеҙендә барлыҡҡа килгән нәмә; **порожде́ние о́бщества** йәмғиәт тыуҙырған нәмә

**ПОРО́ЖИСТЫЙ,** -ая, -ое тупһалы, һикәлтәле; **поро́жистая река́** һикәлтәле йылға

**ПОРО́ЖНИЙ,** -яя, -ее *разг.* буш, әйбер тейәлмәгән; **поро́жнее ведро́** буш биҙрә ♦ **перелива́ть из пусто́го в поро́жнее** юҡты бушҡа ауҙарыу

**ПОРОЖНЯ́К** *м*; *разг.* буш (йөкһөҙ) транспорт

**ПОРОЖНЯКО́М** *нареч.*; *разг.* буш көйө, йөкһөҙ, йөк тейәмәйенсә; **е́хать порожняко́м** йөк тейәмәйенсә китеп барыу

**ПО́РОЗНЬ** *нареч.* айырым, башҡа, айырым-айырым; **де́йствовать по́рознь** айырым эш итеү

**ПОРОЗОВЕ́ТЬ** *сов.* алһыуланып китеү

**ПОРО́Й** и **ПОРО́Ю** *нареч.* ҡайһы ваҡыт(та), ҡайһы саҡ(та)

**ПОРО́К** *м* **1.** кәмселек, боҙоҡлоҡ, етешһеҙлек; **лжи́вость — са́мый дурно́й поро́к** алдаҡсылыҡ — иң насар етешһеҙлек, кәмселек **2.** (*физический недостаток*) зәғифлек, кәмселек ♦ **поро́к се́рдца** йөрәктәге физик кәмселек

**ПОРОЛО́Н** *м* поролон (*күҙәҫле синтетик материал*)

**ПОРОЛО́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** поролон ...ы; **пороло́новый цех** поролон цехы **2.** поролон, поролондан эшләнгән; **пороло́новая ку́ртка** поролон куртка

**ПОРОСЁНОК** *м* **1.** суҫҡа балаһы **2.** *перен., бран.* суҫҡа, шаҡшы

**ПОРОСИ́ТЬСЯ** *несов.* балалау (*суҫҡаға ҡарата*)

**ПО́РОСЛЬ** *ж* **1.** (*побеги*) үҫенте; **по́росль от пней** төптән сыҡҡан үҫенте **2.** (*молодой лес*) йәш урман

**ПОРОСЯ́ТИНА** *ж* суҫҡа балаһы ите

**ПОРОСЯ́ЧИЙ,** -ая, -ее суҫҡа балаһы ...ы; **порося́чий визг** суҫҡа балаһының сыйылдауы

**ПОРО́ТЬ I** *несов. что* (*распарывать*) һүтеү

**ПОРО́ТЬ II** *несов. кого*; *разг.* (*сечь, бить*) сыптырыу, ярыу; **поро́ть ремнём** ҡайыш менән ярыу ♦ **поро́ть горя́чку** ашығып эш итеү

**ПОРО́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* һүтелеү; **рука́в по́рется** еҥ һүтелә **2.** *страд. от* **поро́ть** I

**ПО́РОХ** *м* дары; **безды́мный по́рох** төтөнһөҙ дары ♦ **держа́ть по́рох сухи́м** һәр саҡ әҙер тороу; **не хвата́ет по́роху** көс етмәй, хәлдән килмәй; **по́рохом па́хнет** *см.* **па́хнуть**

**ПОРОХОВНИ́ЦА** *ж* дары һауыты ♦ **есть ещё по́рох в пороховни́цах** көс бар әле, дәрт һүнмәгән әле

**ПОРОХОВО́Й,** -ая, -ое дары ...ы; **порохово́й дым** дары төтөнө

**ПОРО́ЧИТЬ** *несов. кого-что* яманлау, хурлау, ҡара яғыу; **поро́чить и́мя** *чьё-л.* *кемдеңдер* исеменә ҡара яғыу

**ПОРО́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** боҙоҡлоҡ, әҙәпһеҙлек; **поро́чность поведе́ния** тәртиптең боҙоҡлоғо **2.** яңылыш, (хата), булыу, кәмселек; **поро́чность доказа́тельств** дәлилдәрҙең яңылыш булыуы

**ПОРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*безнравственный*) боҙоҡ, әҙәпһеҙ; **поро́чный челове́к** әҙәпһеҙ кеше **2.** (*неправильный*) яңылыш, хата; **поро́чные ме́тоды** яңылыш алымдар ♦ **поро́чный круг** ҡотолғоһоҙ хәл

**ПОРО́ША** *ж* ҡырпаҡ ҡар

**ПОРОШИ́ТЬ** *несов. что* и *без доп.* ҡырпаҡлау; **снег пороши́т** ҡар ҡырпаҡлап тора

**ПОРОШКО́ВЫЙ,** -ая, -ое онтаҡ; **порошко́вое молоко́** онтаҡ һөт

**ПОРОШО́К** *м* онтаҡ, порошок; **зубно́й порошо́к** теш онтағы; **стира́льный порошо́к** кер онтағы; **принима́ть порошо́к** онтаҡ ҡабул итеү ♦ **стере́ть в порошо́к** *кого* көл итеү, көлөн күккә осороу

**ПОРО́Ю** *нареч. см.* **поро́й**

**ПОРТ** *м* порт; **речно́й порт** йылға порты; **торго́вый порт** сауҙа порты

**ПОРТА́Л** *м* портал (**1.** *архит. ҙур йорттарҙың төрлө рәүештә матурлап эшләнгән тышҡы ишеге* **2.** *тех.* (*"П" хәрефе рәүешендәге рам — машина өлөшө*); **порта́л с коло́ннами** колонналы портал

**ПОРТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *архит.* портал ...ы; **порта́льные коло́нны** портал колонналары **2.** *тех.* порталлы; **порта́льный кран** порталлы кран; **порта́льный стано́к** порталлы станок

**ПОРТАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое портатив, бәләкәй күләмле, йөрөтөргә уңайлы; **портати́вный магнитофо́н** портатив магнитофон; **портати́вная пи́шущая маши́нка** портатив яҙыу машинкаһы

**ПОРТВЕ́ЙН** *м* портвейн; **бе́лый портве́йн** аҡ портвейн; **пить портве́йн** портвейн эсеү

**ПО́РТИК** *м*; *архит.* портик (*ҡыйыҡлы галерея*)

**ПО́РТИТЬ** *несов. кого-что*; *в разн. знач.* боҙоу; **по́ртить маши́ну** машинаны боҙоу; **по́ртить зре́ние** күҙҙе боҙоу; **по́ртить настрое́ние** кәйефте боҙоу; **по́ртить отноше́ния** араны боҙоу ♦ **по́ртить кровь** *кому* ҡанын боҙоу, асыуландырыу

**ПО́РТИТЬСЯ** *несов.*; *в разн. знач.* боҙолоу; **ле́том мя́со бы́стро по́ртится** йәйен ит тиҙ боҙола; **пого́да начала́ по́ртиться** көн боҙола башланы; **отноше́ния у них по́ртятся** уларҙың аралары боҙола; **без присмо́тра ребёнок по́ртится** күҙҙолаҡһыҙ бала боҙола

**ПОРТНО́Й** *м* и **ПОРТНИ́ХА** *ж* тегенсе; **мужско́й портно́й** ирҙәр кейеме тегенсеһе

**ПОРТНЯ́ЖНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* тегенеү, тегенселек менән шөғөлләнеү

**ПОРТНЯ́ЖНИЧЕСТВО** *с* тегенселек

**ПОРТНЯ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое тегенселек ...ы; **портня́жное де́ло** тегенселек эше

**ПОРТОВИ́К** *м* порт хеҙмәткәре

**ПОРТО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** порт ...ы; **порто́вые рабо́чие** порт эшселәре **2.** портлы; **порто́вый го́род** портлы ҡала

**ПОРТРЕ́Т** *м* **1.** (*произведение изобразительного искусства*) портрет, һүрәт, рәсем **2.** *лит.* портрет; **портре́т гла́вного геро́я рома́на** романда төп геройҙың портреты

**ПОРТРЕТИ́СТ** *м* портретсы (*портрет яһаусы рәссам*)

**ПОРТРЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое портрет(тар) ...ы, портрет яһау ...ы; **портре́тная галере́я** портреттар галереяһы; **портре́тная жи́вопись** портрет яһау сәнғәте

**ПОРТСИГА́Р** *м* портсигар; **сере́бряный портсига́р** көмөш портсигар



5 зак. 2.0007.06

**ПОРТУГА́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое португал ...ы, Португалия ...ы; **португа́льский язы́к** португал теле

**ПОРТУГА́ЛЬЦЫ** *мн.* португалдар, португал халҡы // *ед.* **португа́лец** *м* португал ир-аты; **португа́лка** *ж* португал ҡатын-ҡыҙы

**ПОРТУПЕ́Я** *ж*; *воен.* портупея; **переки́нуть портупе́ю че́рез плечо́** портупеяны иңбаш аша һалыу

**ПОРТФЕ́ЛЬ** *м* портфель; **ко́жаный портфе́ль** күн портфель

**ПОРТЬЕ́** *м нескл.* портье (*ҡунаҡханаға ингән урында асҡыс һаҡлаусы, ҡүҙ-колаҡ булыусы хеҙмәткәр*)

**ПОРТЬЕ́РА** *ж* портьер, шаршау (*ҡалын тауарҙан ишек йә тәҙрә ҡормаһы*)

**ПОРТЯ́НКА** *ж* силгау, сылгау; **обма́тывать но́ги портя́нками** аяҡҡа силгау урау

**ПОРУБИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* (*вырубить всё, многое*) ҡырҡыу, киҫеү, ҡырҡып (киҫеп) бөтөрөү; **поруби́ть лес** урманды ҡырҡып бөтөрөү **2.** *кого-что* (*изрубить всё, всех*) тураҡлау, ҡырҡҡылау, ҡырҡҡылап (тураҡлап) бөтөрөү; **поруби́ть са́блей** ҡылыс менән тураҡлап бөтөрөү **3.** *что*, *чего* и *без доп.* ҡырҡып (киҫеп) алыу, бер аҙ ҡырҡыу (киҫеү); **поруби́ть дров** утын ҡырҡып алыу

**ПОРУ́БКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **поруби́ть** 1; **2.** (*вырубка*) ҡырҡынды

**ПОРУ́БЩИК** *м*; *разг.* урман ҡырҡыусы

**ПОРУГА́НИЕ** *с* мәсхәрә, хурлыҡ

**ПОРУГА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* орошоп (тиргәп, әрләп, һүгеп) алыу **2.** *обычно в ф. прич.* мәсхәрәләнеү, хурланыу; **пору́ганная честь** хурланған намыҫ

**ПОРУГА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*поссориться*) тиргәшеү, әрләшеү, әйткеләшеү; **поруга́ться с сосе́дом** күрше менән әйткеләшеү **2.** (*ругаться некоторое время*) бер аҙ тиргәшеү (һүгенеү)

**ПОРУ́ГИВАТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* тиргәштереү, әрләштереү

**ПОРУ́КА: взять (брать) на пору́ки** үҙ яуаплылығына (өҫтөңә) алыу (*хөкөм тикшереүендәге кешене*); **отда́ть на пору́ки** *кому кемдеңдер* яуаплылығына биреү

**ПОРУЧА́ТЬ** *несов. см.* **поручи́ть**

**ПОРУЧЕ́НИЕ** *с* йомош, тапшырылған эш; **испо́лнить поруче́ние** йомошто башҡарыу; **посла́ть с поруче́нием** йомош менән ебәреү

**ПОРУ́ЧИК** *м* поручик (*революцияға тиклем Рәсәйҙә офицер чины*)

**ПОРУЧИ́ТЕЛЬ** *м* яуаплылыҡты өҫтөнә алыусы

**ПОРУЧИ́ТЕЛЬСТВО** *с* яуаплылыҡты өҫкә алыу

**ПОРУЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кому-чему*, *что* и *с неопр.* йөкмәтеү, ҡушыу; **поручи́ть тру́дную рабо́ту** ауыр эш ҡушыу **2.** (*вверить кого-л. чьим-л. заботам*) тапшырыу, ҡарарға биреү; **поручи́ть дете́й** *кому-л. кемгәлер* балаларҙы тапшырыу

**ПОРУЧИ́ТЬСЯ** *сов. за кого-что* яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыу

**ПО́РУЧНИ** *мн.* (*ед.* **по́ручень** *м*) таянғыс; **держа́ться за по́ручень** тыянғысҡа тотоноу

**ПОРФИ́Р** *м*; *мин.* порфир (*вулканик тау тоҡомо*)

**ПОРФИ́РА** *ж* порфира (*монархтар өсөн тегелгән ҡуйы ҡыҙыл төҫтәге оҙон мантия*)

**ПОРХА́НИЕ** *с см.* **порха́ть**

**ПОРХА́ТЬ** *несов.* **1.** пыр-пыр осоу, леп-леп осоу; **ба́бочки порха́ют** күбәләктәр леп-леп оса **2.** *перен.*, *ирон.* (*о людях*) күңел асып йөрөү

**ПОРЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое өлөшлө; **порцио́нные блю́да** өлөшлө ашамлыҡтар

**ПО́РЦИЯ** *ж* өлөш; **заказа́ть по́рцию пло́ва** бер өлөш былауға заказ биреү

**ПО́РЧА** *ж* **1.** *см.* **по́ртить, по́ртиться**; **убере́чь проду́кты от по́рчи** аҙыҡты боҙолоуҙан һаҡлау **2.** *разг.* (*испорченное место*) боҙоҡ, боҙолған ер

**ПО́РЧЕНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* боҙолған; **по́рченое я́блоко** боҙолған алма

**ПО́РШЕНЬ** *м* поршень, бешкәк

**ПОРШНЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** поршень ...ы, бешкәк ...ы; **поршневы́е ко́льца** бешкәк дүңгәләктәре **2.** бешкәкле, поршенле; **поршнево́й насо́с** бешкәкле насос

**ПО́РЫ** *мн.* (*ед.* **по́ра** *ж*) **1.** *анат.* күҙәнәк **2.** (*промежуток между частицами вещества*) күҙәү, ваҡ тишек

**ПОРЫ́В** *м* **1.** (*внезапное усиление ветра*) ҡапыл иҫеү, иҫеп ебәреү; **поры́в ве́тра** елдең ҡапыл иҫеүе **2.** *чего*, *какой* ынтылыш, дәрт, атлығыу, уҡталыу; **си́льный поры́в** көслө ынтылыш; **поры́в ра́дости** шатлыҡ дәрте

**ПОРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **порва́ть** 2

**ПОРЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **порва́ться** 2; **2.** *страд. от* **порыва́ть**

**ПОРЫВА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** ынтылыу; **порыва́ться вперёд** алға ынтылыу **2.** *с неопр.* (*пытаться что-л. сделать*) ынтылыу, атлығыу, талпыныу, ашҡыныу; **порыва́ться встать** торорға ынтылыу; **порыва́ться уе́хать** китергә талпыныу

**ПОРЫ́ВИСТОСТЬ** *ж* **1.** ыҙғарлыҡ, киҫкенлек, ҡапыл иҫеү; **поры́вистость ве́тра** елдең ҡапыл иҫеүе **2.** (*резкость*) киҫкенлек; **поры́вистость движе́ний** хәрәкәттәрҙең киҫкенлеге **3.** (*пылкость*) ҡыҙыулыҡ, ярһыулыҡ; **поры́вистость хара́ктера** холоҡтоң ҡыҙыулығы

**ПОРЫ́ВИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неровный, с внезапными усилениями*) ыҙғар, һыҙғаҡ, әсе, ҡапыл (киҫкен) иҫкән; **поры́вистый ве́тер** ҡапыл иҫкән ел **2.** (*резкий*) киҫкен; **поры́вистое движе́ние** киҫкен хәрәкәт **3.** (*пылкий*) ҡыҙыу, ярһыу; **челове́к с поры́вистой нату́рой** ярһыу тәбиғәтле кеше

**ПОРЫЖЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое уңып һарғайған, көнгә көйгән, ерән төҫкә ингән; **порыже́лая трава́** көнгә көйгән үлән

**ПОРЫЖЕ́ТЬ** *сов.* уңып һарғайыу, көнгә көйөү, ерән төҫкә инеү

**ПОРЫХЛЕ́ТЬ** *сов. см.* **рыхле́ть**

**ПОРЯ́ДКОВЫЙ,** -ая, -ое рәт ...ы; **поря́дковый но́мер** рәт номеры; **поря́дковое числи́тельное** *грам.* рәт һаны

**ПОРЯ́ДКОМ** *нареч.*; *разг.* **1.** (*изрядно*) байтаҡ, шаҡтай, етерлек; **поря́дком надое́ло** шаҡтай туйҙырҙы **2.** (*как следует*) тейешенсә, йүнләп, рәтләп; **поря́дком разобра́ться** *в чём-л. берәй нәмәне* тейешенсә тикшереү

**ПОРЯ́ДОК** *м*; *в разн. знач.* тәртип; **алфави́тный поря́док** алфавит тәртибе; **образцо́вый поря́док** өлгөлө тәртип; **похо́дный поря́док** поход тәртибе; **поря́док комплектова́ния библиоте́ки** китапхананы комплектлау тәртибе; **в поря́дке обсужде́ния** фекер алышыу тәртибендә; **привести́ в поря́док** тәртипкә килтереү ♦ **в поря́дке** *что*; *в знач. сказ.* тәртиптә; **в поря́дке** *чего*; *в знач. предлога* йөҙөнән; **в поря́дке веще́й** тәбиғи; **в рабо́чем поря́дке** эш барышында; **для поря́дка**: 1) (*для поддержания норм в чём-л.*) тәртип булһын өсөн; 2) (*для соблюдения принятых правил*) йола һаҡлау маҡсатында; **поря́док дня** көн тәртибе; **свои́м поря́дком** кәрәгенсә, тейешенсә, үҙ яйы менән

**ПОРЯ́ДОЧНО** *нареч.* **1.** намыҫлы, рәтле, йүнле; **вести́ себя́ поря́дочно** үҙеңде йүнле тотоу **2.** *в знач. числ.* (*достаточно, много кого-чего-л.*) байтаҡ, арыу уҡ; **ждать пришло́сь поря́дочно** арыу уҡ көтөргә тура килде

**ПОРЯ́ДОЧНОСТЬ** *ж* намыҫлылыҡ, әҙәплелек

**ПОРЯ́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*честный*) намыҫлы, әҙәпле; **поря́дочный челове́к** намыҫлы кеше **2.** (*довольно хороший*) йүнле, рәтле, арыу **3.** (*значительный*) байтаҡ ҡына, шаҡтай (ярайһы) ғына; **поря́дочная су́мма** байтаҡ ҡына сумма; **сего́дня поря́дочный моро́з** бөгөн ярайһы ғына һыуыҡ

**ПОСАДИ́ТЬ** *сов. см.* **сажа́ть**; **посади́ть цветы́** сәскә ултыртыу; **посади́ть за стол** өҫтәл артына ултыртыу; **посади́ть в по́езд** поезға ултыртыу; **уме́ло посади́ть самолёт** самолётты оҫта ултыртыу; **посади́ть в тюрьму́** төрмәгә ултыртыу; **посади́ть пти́цу в кле́тку** ҡошто ситлеккә ябыу; **посади́ть больно́го на дие́ту** ауырыуҙы диетаға ултыртыу ♦ **посади́ть в кало́шу** *кого* ағас атҡа атландырыу; **посади́ть на мель**: 1) *что* ҡомға ултыртыу; 2) *кого-что*; *перен.* (*поставить в затруднительное положение*) ауыр хәлгә ҡалдырыу; **посади́ть на ше́ю** *кому* елкәгә ултыртыу (*кеше иҫәбенә йәшәтеү*)

**ПОСА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **посади́ть**; **поса́дка карто́феля** бәрәңге ултыртыу; **поса́дка начина́ется в час** сәғәт берҙә ултыртыу башлана **2.** ултырыу; **вы́нужденная поса́дка самолёта** самолёттың сараһыҙҙан ергә ултырыуы; **плоха́я поса́дка в седле́** эйәрҙә насар ултырыу

**ПОСА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* ултыртыу ...ы; **поса́дочные маши́ны** ултыртыу машиналары; **поса́дочные рабо́ты** ултыртыу эштәре **2.** *ав.* ултырыу ...ы; **поса́дочная площа́дка** ултырыу майҙаны; **поса́дочный знак** ултырыу билдәһе; **поса́дочный тало́н** ултырыу талоны

**ПОСАЖЁНЫЙ: посажёный оте́ц** үкел (ҡиәмәтлек, морондоҡ) атай; **посажёная мать** ҡиәмәтлек (үкел, морондоҡ) инәй (әсәй)

**ПОСА́ПЫВАТЬ** *несов.* мышылдау, мыш-мыш килеү, мышнау

**ПОСВА́ТАТЬ** *сов. см.* **сва́тать** 1, 2

**ПОСВА́ТАТЬСЯ** *сов. см.* **сва́таться**

**ПОСВЕЖЕ́ТЬ** *сов. см.* **свеже́ть**

**ПОСВЕТИ́ТЬ** *сов. кому-чему* и *без доп.* яҡтыртып тороу, бер аҙ яҡтыртыу

**ПОСВЕТЛЕ́ТЬ** *сов. см.* **светле́ть** 1—3; **не́бо посветле́ло** күк йөҙө яҡтырып китте; **лицо́ его́ посветле́ло** уның йөҙө асылып китте

**ПО́СВИСТ** *м* һыҙғырыу, һыҙғырыҡ; **моло-де́цкий по́свист** егеттәрсә һыҙғырыу

**ПОСВИСТА́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **посвисте́ть 2.** *кого-что*; *разг.* (*подозвать свистом*) һыҙғырып саҡырыу

**ПОСВИСТЕ́ТЬ** *сов.* һыҙғырыу, һыҙғырып алыу

**ПОСВИ́СТЫВАТЬ** *несов.* һыҙғырғылау, һыҙғырыныу

**ПО-СВО́ЙСКИ** *нареч.*; *разг.* **1.** (*по своему усмотрению*) үҙенсә, үҙ иркенсә; **распра́виться по-сво́йски** *с кем-л. берәйһенән* үҙенсә үс алыу **2.** (*как принято у близких*) үҙ итеп, дуҫтарса; **скажу́ тебе́ по-сво́йски** һиңә үҙ итеп әйтәм

**ПОСВЯТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, во что* таныштырыу, асып һалыу; **посвяти́ть дру́га в свою́ та́йну** дуҫыңа сереңде асып һалыу **2.** *кому-чему* арнау, бағышлау, биреү; **посвяти́ть свою́ жизнь иску́сству** ғүмереңде сәнғәткә арнау **3.** (*с предлогом "в" и старой формой вин. п. мн. ч.*) сафына ылыҡтырыу (алыу); **посвяти́ть в механиза́торы** механизаторҙар сафына алыу; **посвяти́ть в рабо́чие** эшселәр сафына алыу

**ПОСВЯЩА́ТЬ** *несов. см.* **посвяти́ть**

**ПОСВЯЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **посвяти́ть — посвяща́ть 2.** (*надпись*) бағышлама (*арнау яҙыуы*); **посвяще́ние в стиха́х** шиғыр менән яҙылған бағышлама

**ПОСЕ́В** *м* **1.** *см.* **посе́ять**; **посе́в ози́мых** ужым сәсеү **2.** (*то, что посеяно*) сәсеү, сәсеүлек; **пло́щадь посе́вов** сәсеүлек майҙаны

**ПОСЕВНО́Й,** -ая, -ое **1.** сәсеү ...ы; **посевно́й овёс** сәсеү һолоһо; **посевны́е маши́ны** сәсеү машиналары **2.** *в знач. сущ.* **посевна́я** *ж*; *разг.* сәсеү, сәсеү ваҡыты

**ПОСЕДЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* сал төшкән, салланған, ағарған; **поседе́лые во́лосы** салланған сәстәр

**ПОСЕДЕ́ТЬ** *сов. см.* **седе́ть**

**ПОСЕЛЕ́НЕЦ** *м* **1.** күскенсе **2.** (*сосланный на поселение*) һөргөнгә ебәрелгән кеше

**ПОСЕЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **посели́ть** — **поселя́ть** 1, **посели́ться** — **поселя́ться 2.** (*селение*) ултыраҡ, ауыл; **на цели́нных зе́млях появи́лись но́вые поселе́ния** сиҙәм ерҙәрҙә яңы ауылдар барлыҡҡа килде **3.** һөргөн; **отпра́вить на поселе́ние** һөргөнгә ебәреү

**ПОСЕЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* урынлаштырыу; **посели́ть тури́стов в гости́нице** туристарҙы ҡунаҡханаға урынлаштырыу **2.** *что*; *перен.* (*вызвать*) тыуҙырыу, уятыу, килтереп сығарыу; **посели́ть сомне́ние** шик тыуҙырыу

**ПОСЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* ултыраҡланыу, урынлашыу; **посели́ться в це́нтре го́рода** ҡаланың үҙәгенә урынлашыу

**ПОСЕЛКО́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡасаба ...ы; **поселко́вая больни́ца** ҡасаба хәстәханаһы

**ПОСЁЛОК** *м* ҡасаба; **рабо́чий посёлок** эшселәр ҡасабаһы

**ПОСЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **посели́ть**

**ПОСЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **посели́ться 2.** *страд. от* **поселя́ть**

**ПОСЕРЕБРИ́ТЬ** *сов. см.* **серебри́ть**; **посеребри́ть ло́жку** ҡалаҡҡа көмөш йүгертеү; **седина́ посеребри́ла виски́** сал сикәләрҙе көмөшләндерҙе

**ПОСЕРЕДИ́НЕ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* уртала, уртанан; **стоя́ть посереди́не** уртала тороу **2.** *предлог с род. п.* уртаһында; **посереди́не ко́мнаты** бүлмә уртаһында

**ПОСЕРЕ́ТЬ** *сов. см.* **сере́ть** 1; **не́бо посере́ло** күк йөҙө ҡараңғыланды; **лицо́ посере́ло** йөҙө ҡарайҙы

**ПОСЕРЬЁЗНЕТЬ** *сов.*; *разг.* етдиләнеү, етдиләнеп китеү; **его́ лицо́ посерьёзнело** уның йөҙө етдиләнеп китте

**ПОСЕТИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПОСЕТИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* килеүсе, ҡарарға (күрергә) килеүсе, йомош менән килеүсе; **посети́тель музе́я** музей ҡарарға килеүсе

**ПОСЕТИ́ТЬ** *сов. кого-что* килеү, барыу, килеп (барып) сығыу; **посети́ть знако́мых** таныштарға барып сығыу; **посети́ть вы́ставку** күргәҙмә ҡарарға барыу

**ПОСЕ́ТОВАТЬ** *сов. см.* **се́товать** 2; **посе́товать на свою́ боле́знь** үҙенең ауырыуына зарланыу

**ПОСЕЩА́ЕМОСТЬ** *ж* йөрөү, йөрөш; **посеща́емость уро́ков** дәрестәргә йөрөш

**ПОСЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **посети́ть**

**ПОСЕЩЕ́НИЕ** *с см.* **посети́ть**; **посеще́ние теа́тра** театрға барыу

**ПОСЕ́ЯТЬ** *сов.* **1.** *см.* **се́ять** 1, 2; **что посе́ешь, то и пожнёшь** ни сәсһәң, шуны урырһың; **посе́ять вражду́** дошманлыҡ таратыу **2.** *разг.* (*потерять*) юғалтыу; **посе́ять перча́тки** бирсәткә юғалтыу

**ПОСИДЕ́ЛКИ** *только мн.* ултырма, аулаҡ (өй), кис ултырыу; **пойти́ на посиде́лки** ултырмаға барыу

**ПОСИДЕ́ТЬ** *сов.* ултырып алыу (тороу), әҙерәк (бер аҙ) ултырыу; **посиде́ть у сосе́дей** күршеләрҙә бер аҙ ултырыу

**ПОСИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое көс етерлек, ҡулдан (көстән) килерлек, ҡулдан килгән тиклем; **поси́льный труд** көс етерлек хеҙмәт; **поси́льная по́мощь** ҡулдан килгән тиклем ярҙам

**ПОСИНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое күгәргән, күгәреп бөткән; **посине́лые гу́бы** күгәргән ирендәр

**ПОСИНЕ́ТЬ** *сов. см.* **сине́ть** 1; **посине́ть от хо́лода** һыуыҡтан күгәреп бөтөү

**ПОСКАКА́ТЬ** *сов.* **1.** (*понестись вскачь*) саба башлау, сабып китеү **2.** (*попрыгать*) һикереү, һикергеләү; **поскака́ть на одно́й ноге́** һыңар аяҡта һикереү

**ПОСКОБЛИ́ТЬ** *сов. что* ҡырып алыу, ҡырыу

**ПОСКОЛЬЗНУ́ТЬСЯ** *сов.* тайып китеү; **поскользну́ться и упа́сть** тайып китеп йығылыу

**ПОСКО́ЛЬКУ** *союз* (*так как*) -лыҡтан/-лектән, -ға/-гә күрә, -ғас/-гәс, -ған/-гән икән; **поско́льку ты спеши́шь, поговори́м по́сле** һин ҡабаланғас, аҙаҡ һөйләшербеҙ инде ♦ **посто́льку поско́льку** *см.* **посто́льку**

**ПОСКРЕСТИ́** *сов. что* и *без доп.* (бер аҙ) ҡырыу, ҡырғылау, тырнаштырыу; **поскрести́ сапоги́** итекте ҡырғылау

**ПОСКРЕСТИ́СЬ** *сов.*; *разг.* ҡыштырлап (тырнап) алыу, шытырлатып ҡуйыу

**ПОСКРИПЕ́ТЬ** *сов.* шығырлау, шығырлап ҡуйыу, шығырлатыу, шығырлатып ҡуйыу; **поскрипе́ть зуба́ми** теште шығырлатыу; **дверь поскри́пывает** ишек шығырлай

**ПОСКРИ́ПЫВАТЬ** *несов.* **1.** шығырлау, шығыр-шығыр килеү; **поло́зья поскри́пывают по кре́пкому сне́гу** сана табандары ҡаты ҡарҙа шығыр-шығыр килә **2.** *чем* шығырлатыу, шығыр-шығыр килтереү

**ПОСКУПИ́ТЬСЯ** *сов. на что, с неопр.* и *без доп.* һаранланыу, һаранлыҡ күрһәтеү; **поскупи́ться на пода́рки** бүләк биреүгә һаранлыҡ күрһәтеү

**ПОСЛАБЛЕ́НИЕ** *с* йомшаҡлыҡ; **дать послабле́ние** йомшаҡлыҡ күрһәтеү

**ПОСЛА́НЕЦ** *м* илсе, вәкил; **посла́нцы наро́да** халыҡ вәкилдәре

**ПОСЛА́НИЕ** *с* хат, яҙма мөрәжәғәт; **любо́вное посла́ние** мөхәббәт хаты; **посла́ние президе́нта конгре́ссу** президенттың конгресҡа яҙма мөрәжәғәте

**ПОСЛА́ННИК** *м* **1.** кесе илсе (*дипломатик вәкил*) **2.** *трад.-поэт. см.* **посла́нец**

**ПОСЛА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, кому*; *в разн. знач.* ебәреү; **посла́ть учи́ться** уҡырға ебәреү; **посла́ть письмо́** хат ебәреү; **посла́ть приве́т** сәләм ебәреү **2.** *что* (*бросить, направить*) йүнәлтеү, тибеп ебәреү; **посла́ть мяч в воро́та** тупты ҡапҡаға тибеп ебәреү ♦ **чем бог посла́л (пошлёт)** бары менән байрам

**ПО́СЛЕ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* аҙаҡ(тан), һуңынан; **поговори́м по́сле** аҙаҡтан һөйләшербеҙ **2.** *предлог с род. п.* -дан/-дән һуң; **по́сле рабо́ты** эштән һуң

**ПОСЛЕ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "һуңғы", "аҙаҡҡы" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **послеинститу́тский** институттан һуңғы; **послеобе́денный** төштән һуңғы

**ПОСЛЕ́Д** *м*; *анат.* (*у женщины*) һуңғылыҡ; (*у самки животного*) сыу, сүп, сыуын

**ПОСЛЕДИ́ТЬ** *сов. за кем-чем* күҙәтеү, күҙәтеп тороу, ҡараштырыу

**ПОСЛЕ́ДНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*конечный в ряду однородных предметов, явлений*) аҙаҡҡы, һуңғы, ахырғы; **после́дний день неде́ли** аҙнаның аҙаҡҡы көнө; **до после́днего вздо́ха** һуңғы һулышҡа тиклем; **за после́днее вре́мя** һуңғы ваҡытта **2.** (*оставшийся к концу*) аҙаҡҡы, һуңғы, аҡтыҡ; **собра́ть после́дние си́лы** аҡтыҡ көстө йыйыу **3.** (*предыдущий*) үткән, һуңғы; **на после́днем собра́нии** һуңғы йыйылышта **4.** (*новейший*) һуңғы, яңы; **после́дние но́вости** һуңғы хәбәрҙәр; **после́днее достиже́ние те́хники** техниканың һуңғы ҡаҙанышы **5.** (*окончательный*) һуңғы; **э́то моё после́днее сло́во** был минең һуңғы һүҙем **6.** *разг.* (*самый плохой*) аҡтыҡҡы, иң насар (эшәке); **э́то уже́ после́днее де́ло** был инде иң насар эш; **изруга́ть после́дними слова́ми** иң эшәке һүҙҙәр менән әрләү **7.** *в знач. сущ.* **после́днее** *с* аҡтығы, аҙаҡҡыһы, һуңғыһы, ҡалдыҡ; **отда́ть после́днее** аҡтығын биреү ♦ **после́дний крик мо́ды** *см.* **крик**; **до после́днего дыха́ния** *см.* **дыха́ние**; **до после́днего** бөтә көскә, бөтә мөмкинлекте биреп

**ПОСЛЕ́ДОВАТЕЛЬ** *м* и **ПОСЛЕ́ДОВАТЕЛЬНИЦА** *ж* эйәреүсе, юлынан барыусы шәкерт

**ПОСЛЕ́ДОВАТЕЛЬНОСТЬ** *ж* эҙмә-эҙлелек, бер-бер артлы булыу; **логи́ческая после́довательность** логик эҙмә-эҙлелек

**ПОСЛЕ́ДОВАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*непрерывно следующий друг за другом*) бер-бер артлы, эҙмә-эҙлекле; **после́довательные эта́пы рабо́ты** эштең бер-бер артлы этаптары; **после́довательная сме́на времён го́да** йыл миҙгелдәренең бер-бер артлы алмашынып тороуы **2.** (*логически обоснованный*) эҙмә-эҙлекле; **после́довательный вы́вод** эҙмә-эҙлекле һығымта

**ПОСЛЕ́ДОВАТЬ** *сов.* **1.** *за кем-чем* (*пойти, поехать вслед*) эйәреү, эйәреп барыу (китеү); **за обо́зом после́довали мужчи́ны** йөк артынан ир-ат эйәрҙе **2.** (*наступить после чего-л.*) (артынса) булыу; **отве́та на письмо́ не после́довало** *безл.* хатҡа артынса яуап булманы **3.** *кому-чему* эйәреү, -са/-сә эшләү; **после́довать приме́ру** *чьему-л.* *берәүҙең* өлгөһөнсә эшләү

**ПОСЛЕ́ДСТВИЕ** *с* эҙемтә; **после́дствие катастро́фы** катастрофа эҙемтәһе; **лече́ние после́дствий ревмати́зма** ревматизм эҙемтәләрен дауалау

**ПОСЛЕ́ДУЮЩИЙ,** -ая, -ее артабанғы, шунан (унан, бынан, ошонан), һуңғы; **в после́дующие го́ды** шунан һуңғы йылдарҙа

**ПОСЛЕ́ДЫШ** *м* **1.** *прост.* төпсөк, кинйә, һуңғы бала **2.** *перен., разг.* эйәрсен

**ПОСЛЕЗА́ВТРА** *нареч.* **1.** иртәнән һуң; **прийти́ послеза́втра** иртәнән һуң килеү **2.** *в знач. сущ.* **послеза́втра** *с нескл.* иртәнән һуң; **назна́чить на послеза́втра** иртәнән һуңға тәғәйенләү

**ПОСЛЕЗА́ВТРАШНИЙ,** -яя, -ее *разг.* иртәнән һуңғы; **послеза́втрашний день** иртәнән һуңғы көн

**ПОСЛЕЛО́Г** *м*; *лингв.* бәйләүес; **послело́ги да́тельного падежа́** төбәү килеш бәйләүестәре (*мәҫ.*, "*тиклем*", "*табан*", "*ҡарай*")

**ПОСЛЕОБЕ́ДЕННЫЙ,** -ая, -ое төштән һуңғы; **послеобе́денное вре́мя** төштән һуңғы ваҡыт

**ПОСЛЕРЕВОЛЮЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое революциянан һуңғы

**ПОСЛЕСЛО́ВИЕ** *с* һуңғы һүҙ, һүҙ аҙағы (*китапта*)

**ПОСЛО́ВИЦА** *ж* мәҡәл; **сбо́рник посло́виц** мәҡәлдәр йыйынтығы; **сказа́ть посло́вицу** мәҡәл әйтеү

**ПОСЛУЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **служи́ть** 4; **послужи́ть причи́ной** сәбәпсе булыу **2.** (*служить некоторое время*) (бер аҙ) хеҙмәт итеү

**ПОСЛУЖНО́Й: послужно́й спи́сок** хеҙмәт дәфтәре (*хеҙмәт итеү хаҡында мәғлүмәт бирелгән документ*)

**ПОСЛУША́НИЕ** *с* һүҙ тыңлау, әйткәнде тыңлау, тыңлаусанлыҡ

**ПОСЛУ́ШАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* (*некоторое время*) тыңлау, тыңлап ҡарау (тороу); **до́ктор послу́шал больно́го** табип ауырыуҙы тыңлап ҡараны; **послу́шать ле́кцию** лекция тыңлау **2.** *см.* **слу́шать** 4; **послу́шать отца́** атай һүҙен тыңлау **3.** *повел.* **послу́шай(те)**; *разг.* ҡара(ғыҙ) әле, тыңла(ғыҙ) әле

**ПОСЛУ́ШАТЬСЯ** *сов. см.* **слу́шаться** 1

**ПО́СЛУШНИК** *м* послушник (*монах булырға әҙерләнеүсе*); **по́слушница** *ж* послушница (*монахиня булырға әҙерләнеүсе*)

**ПОСЛУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое тыңлаулы, тыңлаусан, күндәм; **послу́шный ребёнок** тыңлаусан бала

**ПОСЛЫ́ШАТЬСЯ** *сов.* **1.** ишетелеү, ишетелеп ҡалыу; **послы́шались шаги́** аяҡ тауышы ишетелеп ҡалды **2.** *кому-чему безл.* (*почудиться*) ишетелгәндәй булыу, ишетелеп ҡалыу; **мне послы́шался стук** миңә шаҡыу тауышы ишетелгәндәй булды

**ПОСЛЮНИ́ТЬ** *сов. что* шайыҡлау, шылағайлау, төкөрөкләү

**ПОСМА́ТРИВАТЬ** *несов.* ҡараштырыу, күҙ һалғылау, ҡарап алғылау; **посма́тривать в окно́** тәҙрәгә күҙ һалғылау

**ПОСМЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* көлгөләү, көлөп (көлөп-көлөп) ҡуйыу; **посме́иваться про себя́** эстән генә көлөп ҡуйыу

**ПОСМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое алмашлап, алмашлы, сменалы; **посме́нное дежу́рство** алмашлап тороу; **посме́нная рабо́та** сменалы эш

**ПОСМЕ́РТНЫЙ,** -ая, -ое үлгәндән һуң (һуңғы); **посме́ртное изда́ние** үлгәндән һуңғы баҫма

**ПОСМЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *с неопр.* (*осмелиться*) батырсылыҡ итеү, баҙнат итеү, ҡыйыу; **посме́ть сказа́ть** өндәшергә баҙнат итеү **2.** *обычно с отрицанием* (*иметь право на что-л.*) хаҡы булмау, хаҡы юҡ; **не посме́ешь э́того сказа́ть** быны әйтергә хаҡың юҡ

**ПОСМЕШИ́ТЬ** *сов. кого-что* көлдөрөү, көлдөрөп алыу

**ПОСМЕ́ШИЩЕ** *с* **1.** әҙәм көлкөһө; **стать посме́шищем** әҙәм көлкөһөнә ҡалыу **2.** (*глумление*) мыҫҡыл, мәсхәрә; **вы́ставить на посме́шище** *кого-л. берәйһен* мәсхәрәгә ҡалдырыу

**ПОСМЕЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** көлөү, көлөп алыу; **люби́ть посмея́ться** көлөргә яратыу **2.** *над кем-чем* көлөү, көлөп ҡарау

**ПОСМОТРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **смотре́ть** 1—4, 6; **посмотре́ть кинофи́льм** кинофильм ҡарау; **посмотре́ть в окно́** тәҙрәнән ҡарау **2.** *с отрицанием*; *разг.* (*не остановиться перед чем-л.*) ҡарап тормау; **я не посмотрю́, что ты ста́рше** мин һине өлкән кеше тип ҡарап тормам **3.** *в 1 л. мн. ч. буд. вр.* **посмотрим**; *разг.* ҡарап ҡарарбыҙ; **посмо́трим, мо́жет приду́** ҡарап ҡарарбыҙ, бәлки килермен

**ПОСМОТРЕ́ТЬСЯ** *сов.* ҡарау, ҡараныу; **посмотре́ться в зе́ркало** көҙгөгә ҡарау

**ПОСО́БИЕ** *с* **1.** (*денежное*) ярҙам; **посо́бие многоде́тным матеря́м** күп балалы әсәләргә ярҙам **2.** (*учебное*) ҡулланма, әсбап; **нагля́дные посо́бия** күргәҙмә әсбаптар

**ПОСО́БНИК** *м* и **ПОСО́БНИЦА** *ж*; *неодобр.* ярҙамсы, булышсы (*берәй насар эштә*)

**ПОСО́БНИЧЕСТВО** *с* булышлыҡ, булышлыҡ итеү (*насар эшкә*); **посо́бничество беглеца́м** ҡасҡындарға булышлыҡ итеү

**ПОСО́ВЕСТИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оялыу, тартыныу; **посо́веститься вы́пить мно́го** күп эсергә тартыныу

**ПОСОВЕ́ТОВАТЬ** *сов. см.* **сове́товать**

**ПОСОВЕ́ТОВАТЬСЯ** *сов. см.* **сове́товаться**

**ПОСОВЕЩА́ТЬСЯ** *сов.* кәңәшләшеп алыу, бер аҙ кәңәшләшеү; **посовеща́ться с ма́стером** мастер менән кәңәшләшеп алыу

**ПОСОДЕ́ЙСТВОВАТЬ** *сов. кому-чему* бер аҙ ярҙам итеү (күрһәтеү); **посоде́йствовать в реше́нии вопро́са** мәсьәләне хәл итеүҙә бер аҙ ярҙам итеү

**ПОСО́Л I** *м* илсе; **посо́л госуда́рства** дәүләт илсеһе

**ПОСО́Л II** *м см.* **посоли́ть**; **посо́л капу́сты** кәбеҫтә тоҙлау

**ПОСОЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **соли́ть** 1; **посоли́ть суп** ашҡа тоҙ һалыу **2.** *что*, *чего* тоҙлау, тоҙлап ҡуйыу; **посоли́ть огурцы́** ҡыяр тоҙлап ҡуйыу

**ПОСО́ЛЬСТВО** *с* илселек; **соста́в посо́льства** илселек составы; **секрета́рь посо́льства** илселек сәркәтибе

**ПОСОСА́ТЬ** *сов. что* (бер аҙ) имеү, имеп (һурып) алыу, һурыу; **пососа́ть со́ску** бер аҙ имеҙлек һурыу

**ПО́СОХ** *м* таяҡ; **опира́ться на по́сох** таяҡҡа таяныу

**ПОСО́ХНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*засохнуть — о всём, многом*) кибеү, ҡороу, кибеп (ҡороп) бөтөү; **цветы́ посо́хли** сәскәләр кибеп бөткән **2.** (*некоторое время*) кибеңкерәү, һурығыу

**ПОСОЧУ́ВСТВОВАТЬ** *сов. кому-чему* хәленә инеү (кереү), хәлен (ҡайғыһын) уртаҡлашыу, ҡыҙғаныу

**ПОСПА́ТЬ** *сов.* йоҡлап алыу; **ребёнок поспа́л** бала йоҡлап алды

**ПОСПЕВА́ТЬ I** *несов. см.* **поспе́ть** I

**ПОСПЕВА́ТЬ II** *несов. см.* **поспе́ть** II

**ПОСПЕ́ТЬ I** *сов.* өлгөрөү, бешеү, бешеп етеү; **я́годы поспе́ли** еләк-емеш өлгөрә

**ПОСПЕ́ТЬ II** *сов.*; *разг.* өлгөрөү, етешеү, барып (килеп) етеү; **поспе́ть на по́езд** поезға өлгөрөү; **невозмо́жно поспе́ть** *за кем-л. кемдеңдер артынан* етешеп булмай

**ПОСПЕШИ́ТЬ** *сов. см.* **спеши́ть** 1 ♦ **поспеши́шь — люде́й насмеши́шь** ашыҡҡан ашҡа бешкән

**ПОСПЕ́ШНОСТЬ** *ж* ашығыслыҡ, ҡабаланыу; **прояви́ть поспе́шность** ашығыслыҡ күрһәтеү

**ПОСПЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое ашығыс, ҡабалан; **поспе́шный отъе́зд** ашығыс китеп барыу; **поспе́шный вы́вод** ашығыс һығымта

**ПОСПЛЕ́ТНИЧАТЬ** *сов.* ғәйбәт һатып алыу, (әҙерәк) ғәйбәт һатыу; **люби́тель посплетничать** ғәйбәт һатырға яратҡан кеше

**ПОСПО́РИТЬ** *сов.* **1.** *см.* **спо́рить 2.** (*провести некоторое время в споре*) бәхәсләшеү, һүҙ көрәштереү, бәхәсләшеп (һүҙ көрәштереп) алыу

**ПОСРАМИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*навлечь позор*) мәсхәрәләү, оятлы итеү, оятҡа ҡалдырыу; **посрами́ть пе́ред людьми́** кеше алдында оятлы итеү **2.** (*развенчать*) дәрәжәһен (абруйын, данын) төшөрөү

**ПОСРАМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **посрами́ть** 2

**ПОСРЕДИ́** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* уртала, уртаһында **2.** *предлог с род. п.* уртаһында; **посреди́ у́лицы** урам уртаһында

**ПОСРЕДИ́НЕ** *нареч.* и *предлог см.* **посереди́не**

**ПОСРЕ́ДНИК** *м* и **ПОСРЕ́ДНИЦА** *ж* **1.** аралашсы, аралашлыҡ итеүсе; **торго́вый посре́дник** сауҙа аралашсыһы **2.** (*содействующий примирению*) килештереүсе, яраштырыусы; **помири́ться че́рез посре́дника** килештереүсе аша ярашыу

**ПОСРЕ́ДНИЧАТЬ** *несов.* **1.** аралашлыҡ итеү; **посре́дничать в перегово́рах** һөйләшеүҙәрҙә аралашлыҡ итеү **2.** (*в примирении*) яраштырып (килештереп) йөрөү

**ПОСРЕ́ДНИЧЕСТВО** *с* **1.** (*содействие соглашению*) аралашлыҡ; **слу́жба посре́дничества** аралашлыҡ хеҙмәте **2.** (*содействие примирению*) яраштырыу, килештереү

**ПОСРЕ́ДСТВЕННО 1.** *нареч.* уртаса; **учи́ться посре́дственно** уртаса уҡыу **2.** *в знач. сущ.* **посре́дственно** *с нескл.* (*оценка*) уртаса билдәһе; **получи́ть посре́дственно** уртаса билдәһен алыу

**ПОСРЕ́ДСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое уртаса, урта ҡул; **посре́дственные спосо́бности** урта һәләттәр; **посре́дственный отве́т ученика́** уҡыусының уртаса яуабы

**ПОСРЕ́ДСТВОМ** *предлог с род. п.* (*при помощи чего-л.*) ярҙамында, ярҙамы менән; **посре́дством наблюде́ний** күҙәтеүҙәр ярҙамында

**ПОССО́РИТЬ** *сов. см.* **ссо́рить**

**ПОССО́РИТЬСЯ** *сов. см.* **ссо́риться**

**ПОСТ I** *м* **1.** һаҡ, пост; **стоя́ть на посту́** һаҡта тороу; **санита́рный пост** санитария посы; **железнодоро́жный пост** тимер юл посы **2.** (*должность*) эш урыны, урын; **пост дире́ктора заво́да** завод директоры урыны ♦ **на посту́** үҙ урынында (хеҙмәтендә)

**ПОСТ II** *м* пост (*христиан дине буйынса һөтлө һәм итле аш ашамай тороу*)

**ПОСТА́ВИТЬ I** *сов. см.* **ста́вить** ♦ **поста́вить вопро́с ребро́м** *см.* **ребро́**; **поста́вить на коле́ни** теҙ сүктереү, баш эйҙереү; **поста́вить на (своё) ме́сто** *кого кемде* урынына ҡуйыу (ултыртыу)

**ПОСТА́ВИТЬ II** *сов. что* (*доставить, снабдить*) тапшырыу, еткереп биреү, тәьмин итеү; **поста́вить зерно́** ашлыҡ тапшырыу; **поста́вить сырьё для заво́да** заводты сеймал менән тәьмин итеү

**ПОСТА́ВКА** *ж* тапшырма, тапшырыу, тәьмин итеү, биреп (килтереп) тороу; **поста́вка хле́ба госуда́рству** дәүләткә ашлыҡ тапшырыу; **поста́вка сырья́** сеймал менән тәьмин итеү

**ПОСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **поста́вить** II

**ПОСТАВЩИ́К** *м* и **ПОСТАВЩИ́ЦА** *ж* тәьмин итеүсе, килтереп тороусы; **поставщи́к строи́тельных материа́лов** төҙөлөш материалдары менән тәьмин итеүсе

**ПОСТАМЕ́НТ** *м* постамент, нигеҙ (*һәйкәлдең һ.б.*); **грани́тный постаме́нт** гранит постамент

**ПОСТАНОВИ́ТЬ** *сов. что* и *с неопр.* ҡарар итеү (сығарыу); **постанови́ть единогла́сно** бер тауыштан ҡарар итеү

**ПОСТАНО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **поста́вить** I 3, 6, 9—12; **2.** ҡуйылыш; **о́пера в но́вой постано́вке** яңы ҡуйылыштағы опера; **пра́вильная постано́вка ног в та́нце** бейеүҙә аяҡтың дөрөҫ ҡуйылышы **3.** (*спектакль*) постановка; **посмо́трим но́вую постано́вку** яңы постановка ҡарарбыҙ

**ПОСТАНОВЛЕ́НИЕ** *с* ҡарар; **вы́нести постановле́ние** ҡарар сығарыу

**ПОСТАНОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **постанови́ть**

**ПОСТАНО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое сәхнәгә ҡуйыу ...ы; **постано́вочный план** сәхнәгә ҡуйыу планы

**ПОСТАНО́ВЩИК** *м* ҡуйыусы, сәхнәгә ҡуйыусы, сәхнәләштереүсе

**ПОСТАРА́ТЬСЯ** *сов. см.* **стара́ться**

**ПОСТАРЕ́ТЬ** *сов. см.* **старе́ть** 1, 3

**ПОСТЕЛИ́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **постла́ть**

**ПОСТЕ́ЛЬ** *ж* урын, урын-ер, түшәк; **постели́ть посте́ль** урын йәйеү; **лечь в посте́ль** урынға ятыу; **убра́ть посте́ль** урын йыйыу

**ПОСТЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое урын ...ы, урын-ер ...ы, түшәк ...ы; **посте́льные принадле́жности** түшәк кәрәк-ярағы; **посте́льный режи́м** түшәк режимы (*ауырығанда*)

**ПОСТЕПЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое аҡрынлап, әкренләп, аҡрынлыҡ (әкренлек) менән; **постепе́нное выздоровле́ние** әкренләп сәләмәтләнә барыу

**ПОСТЕСНЯ́ТЬСЯ** *сов. с неопр.* оялыу, тартыныу; **постесня́ться войти́ в зал** залға үтергә тартыныу

**ПОСТИГА́ТЬ** *несов. см.* **пости́гнуть**, **пости́чь**

**ПОСТИ́ГНУТЬ** *сов. см.* **пости́чь**

**ПОСТИЖЕ́НИЕ** *с см.* **пости́чь** — **постига́ть** 1; **постиже́ние зако́нов приро́ды** тәбиғәт ҡанундарын аңлау

**ПОСТИЖИ́МЫЙ,** -ая, -ое аңларлыҡ, төшөнөрлөк; **легко́ постижи́мое доказа́тельство** еңел аңларлыҡ дәлил

**ПОСТИЛА́ТЬ** *несов. см.* **постла́ть**

**ПОСТИРА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* йыуыу, йыуып алыу; **постира́ть бельё** кер йыуып алыу

**ПОСТИ́ТЬСЯ** *несов.* пост тотоу

**ПОСТИ́ЧЬ** и **ПОСТИ́ГНУТЬ** *сов.* **1.** *что* (*понять*) аңлау, төшөнөү, аңлап (төшөнөп) алыу; **пости́чь смысл** мәғәнәһенә төшөнөү **2.** *только в 3 л.* (*случиться с кем-л.*) осрау, тарыу; **его́ пости́гло несча́стье** ул бәхетһеҙлеккә осраны

**ПОСТЛА́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* йәйеү, түшәү; **постла́ть ска́терть** ашъяулыҡ йәйеү; **постла́ть посте́ль** урын йәйеү

**ПО́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** итһеҙ, ҡыҫыр; **по́стный суп** ҡыҫыр аш **2.** *разг.* (*не жирный*) майһыҙ, ябыҡ; **по́стное мя́со** ябыҡ ит **3.** *перен.*, *разг.* (*скучный*) бойоҡ, һытыҡ; **по́стное лицо́** һытыҡ сырай

**ПОСТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** пост ...ы, һаҡ ...ы; **постова́я бу́дка** пост будкаһы **2.** постағы; **постово́й милиционе́р** постағы милиционер **3.** *в знач. сущ.* **постово́й** *м* поста тороусы

**ПОСТО́Й** *м*; *разг.* ҡуныу, ҡуна инеү, ҡуныып китеү, тороу (*ғәскәри частарҙың шәхси йорттарҙа квартирала тороуы*); **взять на посто́й** ҡуна индереү

**ПОСТО́ЛЬКУ: посто́льку, поско́льку** *в знач. союза* -ған/-гән икән, шулай булғас; **посто́льку поско́льку** *в знач. нареч.* бигүк; **ве́рить посто́льку поско́льку** *кому-л.* кемгәлер бигүк ышанмау

**ПОСТОРОНИ́ТЬСЯ** *сов.* тайпылыу, ҡайырылыу, юл биреү; **ве́жливо посторони́ться** ихтирам менән юл биреү

**ПОСТОРО́ННИЙ,** -яя, -ее **1.** (*чужой*) сит, ят; **посторо́нний челове́к** сит кеше **2.** (*побочный*) башҡа, бүтән; **занима́ться посторо́нними дела́ми** башҡа эштәр менән шөғөлләнеү **3.** *в знач. сущ.* **посторо́нние** *мн.* ситтәр; **посторо́нним вход воспрещён** ситтәргә инеү тыйыла

**ПОСТОЯ́ЛЕЦ** *м* и **ПОСТОЯ́ЛИЦА** *ж*; *разг.* (ваҡытлыса) тороусы, фатирҙа тороусы

**ПОСТОЯ́ЛЫЙ: постоя́лый двор** *уст.* юлаусылар йорто

**ПОСТОЯ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* даими; **постоя́нная забо́та** даими хәстәрлек; **постоя́нный посети́тель теа́тра** театрға даими йөрөгән кеше; **постоя́нная вы́ставка** даими күргәҙмә; **постоя́нное местожи́тельство** даими йәшәү урыны **2.** (*неизменный в своих склонностях*) үҙгәрмәүсән, тотороҡло, тоғро, тоғролоҡло, даими; **постоя́нный челове́к** тоғро кеше; **постоя́нная любо́вь** тоғролоҡло мөхәббәт ♦ **постоя́нная величина́** *спец.* даими дәүмәл; **постоя́нный капита́л** *эк.* даими капитал; **постоя́нный ток** *физ.* даими ток

**ПОСТОЯ́НСТВО** *с* **1.** даимилыҡ, үҙгәрмәүсәнлек; **постоя́нство температу́ры те́ла** тән температураһының даимилығы **2.** тотороҡлолоҡ, тоғролоҡ; **постоя́нство привы́чек** ғәҙәттәрҙең тотороҡлолоғо; **постоя́нство в любви́** мөхәббәткә тоғролоҡ

**ПОСТОЯ́ТЬ** *сов.* **1.** баҫып тороу, тора биреү; **постоя́ть под дождём** ямғыр аҫтында баҫып тороу; **постоя́ть на посту́** һаҡта баҫып тороу **2.** *за кого-что*; *перен.* (*защитить кого-что-л.*) яҡлау, һаҡлау, ҡурсалау; **постоя́ть за Ро́дину** Тыуған илде һаҡлау **3.** *повел.* **посто́й(те)**: 1) көт(өгөҙ), ашыҡма(ғыҙ); **посто́й, я сейча́с приду́** көт, мин хәҙер килермен; 2) *разг.* (*подожди(те), не торопи(те)сь делать что-л.*) туҡта(ғыҙ) әле, тороп тор(оғоҙ); **посто́йте, вы не оши́блись** туҡтағыҙ әле, һеҙ яңылышманығыҙмы

**ПОСТРАДА́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **пострада́ть 2.** *в знач. сущ.* **пострада́вший** *м* и **пострада́вшая** *ж* зарар (зыян) күргән кеше, зарар (зыян) күреүсе; **оказа́ть по́мощь пострада́вшим от землетрясе́ния** ер тетрәүенән зыян күреүселәргә ярҙам күрһәтеү

**ПОСТРАДА́ТЬ** *сов.* **1.** *от кого-чего, за кого-что* яфа күреү, ғазап сигеү, интегеү **2.** *из-за чего* и *без доп.* (*понести ущерб*) зарар (зыян) күреү (килеү); **пострада́ть от наводне́ния** һыу баҫыуҙан зарар күреү **3.** (*страдать некоторое время*) ғазап сигеү, интегеү

**ПОСТРАНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое бит иҫәбенән, битләп; **постраничный подсчёт** битләп хисаплау

**ПОСТРЕ́Л** *м*; *разг.* шаян, шуҡ (бала) ♦ **наш постре́л везде́ поспе́л** беҙҙең шуҡтың етешмәгән ере юҡ

**ПОСТРЕ́ЛИВАТЬ** *несов.* **1.** *разг.* (*изредка стрелять*) атҡылау, атҡылаштырыу **2.** *безл.* сәнсеп-сәнсеп алыу (ҡуйыу); **в у́хе постре́ливает** ҡолаҡ сәнсеп-сәнсеп ҡуя

**ПОСТРЕЛЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* (*стрелять некоторое время*) атҡылау, бер аҙ атыу **2.** *кого-чего*; *разг.* (*стреляя, добыть некоторое количество дичи*) атып алыу; **пострелять у́ток** өйрәктәр атып алыу **3.** *кого*; *разг.* (*перестрелять*) атып бөтөрөү

**ПО́СТРИГ** *м*; *церк.* сәс ҡырҡтырыу (*монах* (*монахиня*) *булыу йолаһы*)

**ПОСТРИГА́ТЬ** *несов. см.* **постри́чь**

**ПОСТРИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **постри́чься 2.** *страд. от* **постригать**

**ПОСТРИ́ЧЬ** *сов.* **1.** *кого-что* сәс алыу (алдырыу), сәс ҡырҡыу (ҡырҡтырыу) **2.** *кого*; *церк.* сәс ҡырҡтырыу (*монах* (*монахиня*) *булыу өсөн*)

**ПОСТРИ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** сәс алдырыу (ҡырҡтырыу); **постри́чься в парикма́херской** бөҙрәханала сәс алдырыу **2.** *церк.* сәс ҡырҡтырыу; **постри́чься в мона́хи** монахлыҡҡа сәс ҡырҡтырыу

**ПОСТРОЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **постро́ить, постро́иться 2.** төҙөлөш, ҡоролош; **ве́рное построе́ние фра́зы** фразаның дөрөҫ төҙөлөшө

**ПОСТРО́ИТЬ** *сов. см.* **стро́ить**; **постро́ить шко́лу** мәктәп һалыу; **постро́ить баррика́ды** баррикадалар ҡороу; **постро́ить но́вую жизнь** яңы тормош ҡороу; **постро́ить ро́ту** ротаны сафҡа теҙеү

**ПОСТРО́ИТЬСЯ** *сов. см.* **стро́иться** 1—3, 5

**ПОСТРО́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **постро́ить** 1; **постро́йка до́ма** йорт һалыу **2.** (*то, что построено*) ҡаралты, бина; **деревя́нная постро́йка** ағас ҡаралты

**ПОСТРО́МКИ** *мн.* (*ед.* **постро́мка** *ж*) мисәү, мисәү бауы

**ПОСТРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое юл иҫәбенән, юллап; **постро́чная опла́та** юл иҫәбенән түләү

**ПОСТСКРИ́ПТУМ** *м*; *книж.* постскриптум (*хатҡа ҡул ҡуйғас, ҡыҫҡартылған P. S. хәрефтәре менән өҫтәлгән яҙыу*)

**ПОСТУЛА́Т** *м*; *книжн.* постулат (*фаразға нигеҙ итеп алынған фекер*); **вы́сказать в ка́честве постула́та** постулат рәүешендә әйтеү

**ПОСТУЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *книжн.* постулат итеп алыу

**ПОСТУПА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое алға бармалы (ынтылышлы); **поступа́тельное движе́ние иску́сства** сәнғәттең алға ынтылышлы хәрәкәте

**ПОСТУПА́ТЬ** *несов. см.* **поступи́ть**

**ПОСТУПА́ТЬСЯ** *несов. см.* **поступи́ться**

**ПОСТУПИ́ТЬ** *сов.* **1.** эшләү, эш итеү; **он поступи́л пра́вильно** ул дөрөҫ эшләгән; **поступи́ть безрассу́дно** дыуамал эш итеү **2.** *с кем-чем* эшләтеү, мөғәмәлә (эш) итеү; **как с ним поступи́ть** уны ни эшләтергә **3.** инеү, урынлашыу; **поступи́ть в институ́т** институтҡа инеү; **поступи́ть на рабо́ту** эшкә урынлашыу **4.** килеү, алыныу, сығыу; **поступи́ть в прода́жу** һатыуға сығыу

**ПОСТУПИ́ТЬСЯ** *сов. чем* баш тартыу; **поступи́ться свои́ми интере́сами** үҙ мәнфәғәттәреңдән баш тартыу

**ПОСТУПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **поступи́ть** — **поступа́ть** 3, 4; **поступле́ние на рабо́ту** эшкә урынлашыу; **поступле́ние но́вых книг в библиоте́ку** китапханаға яңы китаптар алыныу **2.** (*деньги*) керем, кергән аҡса

**ПОСТУ́ПОК** *м* эшләнгән эш, ҡылыҡ; **че́стный посту́пок** намыҫлы эшләнгән эш; **безрассу́дный посту́пок** уйланмай ҡылынған ҡылыҡ

**ПО́СТУПЬ** *ж* атлау, аҙым; **твёрдая по́ступь** ныҡ аҙым; **уве́ренная по́ступь** ышаныслы аҙым

**ПОСТУЧА́ТЬ** *сов.* шаҡыу, шаҡытыу, ҡағыу; **постуча́ть в дверь** ишек шаҡыу

**ПОСТУЧА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шаҡыу, шаҡылдатыу, ҡағыу; **постуча́ться в окно́** тәҙрә шаҡыу

**ПОСТФА́КТУМ** *нареч.*; *книжн.* постфактум, эш уҙғас; **объяви́ть постфа́ктум** *о чём-л. берәй нәмә хаҡында* эш уҙғас белдереү

**ПОСТЫДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* бер аҙ оялтыу (ҡыҙартыу), оялтып (ҡыҙартып) алыу

**ПОСТЫДИ́ТЬСЯ** *сов. кого-чего, без. доп.* и *с неопр.* оялыу, йөҙ ҡыҙарыу

**ПОСТЫ́ДНЫЙ,** -ая, -ое оятлы, хурлыҡлы; **посты́дный слу́чай** оятлы хәл

**ПОСТЫ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* һөйкөмһөҙ, туйҙырып бөтөргән, теңкәгә тейеп бөткән

**ПОСУ́ДА** *ж* **1.** *собир.* һауыт-һаба, ҡашығаяҡ; **шкаф для посу́ды** ҡашығаяҡ шкафы; **эмалиро́ванная посу́да** эмалле һауыт-һаба **2.** *разг.* (*сосуд*) һауыт

**ПОСУ́ДИНА** *ж*; *разг.* **1.** һауыт; **посу́дина для мёда** бал һауыты **2.** (*судно, лодка*) карап, кәмә

**ПОСУДИ́ТЬ** *сов.* (*обычно с мест. "сам"*) **посуди́(те)**; *разг.* үҙең (үҙегеҙ) уйлап ҡара(ғыҙ)

**ПОСУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое һауыт-һаба ...ы; **посу́дный магази́н** һауыт-һаба магазины

**ПОСУЛИ́ТЬ** *сов. см.* **сули́ть** 1

**ПОСУРО́ВЕТЬ** *сов. см.* **суро́веть**

**ПО́СУХУ** *нареч.*; *разг.* ҡоронан, ҡоро ерҙән; **ходи́ть по́суху** ҡоро ерҙән йөрөү

**ПОСУШИ́ТЬ** *сов. что* киптереп алыу, киптерә төшөү, бер аҙ киптереү; **посуши́ть о́бувь** аяҡ кейемен киптереп алыу

**ПОСУШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* кибенеү, кибенеп тороу (алыу); **посуши́ться на со́лнце** ҡояшта кибенеп алыу

**ПОСЧАСТЛИ́ВИТЬСЯ** *сов. кому* и *без доп.*; *безл.* бәхеткә (уңайы) тура килеү, яйы (уңайы) килеү

**ПОСЧИТА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* һанау, иҫәпләү, һанап (иҫәпләп) сығыу; **посчита́ть де́ньги** аҡсаны иҫәпләп сығыу **2.** *кем-чем, каким* и *с неопр.*; *разг.* һанау, иҫәпләү, уйлау; **посчита́ть неудо́бным** уңайһыҙ тип һанау

**ПОСЧИТА́ТЬСЯ** *сов. с кем-чем* **1.** *см.* **рассчита́ться** 1; **2.** (*принять во внимание*) иҫәпләшеү, иҫәпкә алыу (*берәйһенең фекерен*) **3.** (*свести счёты*) иҫәпләшеү, үс алыу

**ПОСЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **посла́ть**

**ПОСЫ́ЛКА** *ж* **1.** *см.* **посла́ть** — **посыла́ть**; **посы́лка това́ров** тауарҙар ебәреү **2.** посылка; **отпра́вить посы́лку** посылка ебәреү

**ПОСЫ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое посылка ...ы; **посы́лочный я́щик** посылка йәшниге

**ПОСЫ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ебәрелә торған; **посы́льный ка́тер** ебәрелә торған катер **2.** *в знач. сущ.* **посы́льный** *м* и **посы́льная** *ж* йомошсо, йомошҡа йөрөүсе

**ПОСЫ́ПАТЬ** *сов. что, чем* һибеү, һибеп сығыу; **посы́пать доро́жки песко́м** юлға ҡом һибеп сығыу

**ПОСЫПА́ТЬ** *несов. см.* **посы́пать**

**ПОСЫ́ПАТЬСЯ** *сов.* **1.** һибелә (ҡойола) башлау; **и́скры посы́пались** осҡондар һибелә башланы **2.** *разг.* яуа башлау; **посы́пались вопро́сы докла́дчику** докладсыға һорауҙар яуа башланы

**ПОСЯГА́ТЕЛЬСТВО** *с* ҡул һуҙыу, үҙләштерергә маташыу, ҡаршы төшөү; **посяга́тельство на госуда́рственную со́бственность** дәүләт милкенә ҡул һуҙыу

**ПОСЯГА́ТЬ** *несов. см.* **посягну́ть**

**ПОСЯГНУ́ТЬ** *сов. на кого-что* ҡул һуҙыу, хаслыҡ ҡылыу, ҡаршы төшөү, ынтылыу; **посягну́ть на жизнь** *чью-л. берәүҙең* ғүмеренә ҡул һуҙыу

**ПОТ** *м* тир; **ка́пли по́та** тир бөрсөктәре; **облива́ться по́том** тиргә батыу, ҡара тиргә төшөү; **пот гра́дом льётся** шыбыр тир аға ♦ **труди́ться в по́те лица́** тир түгеп эшләү; **по́том и кро́вью** күкрәк көсө менән, ҡара тиргә батып; **до седьмо́го по́та (рабо́тать, труди́ться и т.п.)** йән тир (ете ҡат тир) сыҡҡансы (эшләү, тырышыу һ.б.); **вогна́ть в пот** йән тирен сығарыу; **согна́ть семь пото́в** *с кого* йән тирен һығып алыу

**ПОТАЙНО́Й,** -ая, -ое йәшерен; **потайно́й ход** йәшерен юл; **потайно́й карма́н** йәшерен кеҫә

**ПОТАКА́НИЕ** *с см.* **потака́ть**

**ПОТАКА́ТЬ** *несов. кому-чему, в чём*; *разг.* юл (ирек) ҡуйыу, уҙындырыу; **потака́ть ша́лостям ребёнка** баланың шуҡлығына юл ҡуйыу

**ПОТАСКА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** *кого-что, чего* (*таскать некоторое время*) ташыу, ташып алыу; **потаска́ть дров** утын ташыу **2.** (*перетаскать всё, многое*) ташып бөтөрөү (ҡуйыу); **де́ти потаска́ли все я́блоки** балалар барлыҡ алманы ташып бөтөрҙө

**ПОТАСО́ВКА** *ж*; *разг.* уҫмаҡлашыу, айҡашыу

**ПОТА́ЧКА** *ж*; *разг.* (*поблажка*) уҙындырыу, буйлатыу, юл (ирек) ҡуйыу

**ПОТА́Ш** *м*; *хим.* поташ (*аҡ онтаҡ рәүешендәге, һыуҙа яҡшы ирей торған, производствола киң ҡулланылған һелтеле матдә*)

**ПОТАЩИ́ТЬ** *сов. кого-что* һөйрәп (етәкләп) алып китеү

**ПОТАЩИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һөйрәлеп барыу

**ПОТВО́РСТВО** *с* буйлатыу, ирек (юл) ҡуйыу; **потво́рство капри́зам** көйһөҙләнеүҙәргә ирек ҡуйыу

**ПОТВО́РСТВОВАТЬ** *несов. кому-чему* буйлатыу, ирек (юл) ҡуйыу, уҙындырыу; **потво́рствовать капри́зам ребёнка** баланың көйһөҙлөктәренә ирек ҡуйыу

**ПОТВО́РЩИК** *м* и **ПОТВО́РЩИЦА** *ж* буйлатыусы, ирек (юл) ҡуйыусы, уҙындырыусы

**ПОТЁК** *м* (һыу, май, буяу) аҡҡан эҙ; **потёки на потолке́** түшәмдә һыу аҡҡан эҙҙәр

**ПОТЁМКИ** *только мн.* ҡараңғы, ҡараңғылыҡ; **блужда́ть в потёмках** ҡараңғыла аҙашып йөрөү

**ПОТЕМНЕ́ТЬ** *сов. см.* **темне́ть** 1, 2; **серебро́ потемне́ло** көмөш ҡарайҙы; **в ко́мнате потемне́ло** бүлмә ҡараңғыланып китте

**ПОТЕ́НИЕ** *с см.* **поте́ть**; **поте́ние ног** аяҡ тирләү

**ПОТЕНЦИА́Л** *м* потенциал (**1.** *физ. есемдең бер берәмек массаһындағы эске энергия мөмкинлеген күрһәткән дәүмәл* **2.** *күсм., кит. ниндәйҙер көс-ҡеүәтте эсенә алған мөмкинлек*); **ра́зность потенциа́лов** потенциалдар айырмаһы; **экономи́ческий потенциа́л госуда́рства** дәүләттең иҡтисади потенциалы

**ПОТЕНЦИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** потенциаль, потенциялағы; **потенциа́льная эне́ргия те́ла** есемдең потенциаль энергияһы **2.** (*возможный*) ихтимал, буласаҡ, мөмкин булған; **потенциа́льный проти́вник** буласаҡ дошман

**ПОТЕ́НЦИЯ** *ж*; *книжн.* потенция, эске мөмкинлек, эске һәләт; **тво́рческие поте́нции** эске ижади мөмкинлектәр

**ПОТЕПЛЕ́НИЕ** *с см.* **потепле́ть**; **потепле́ние морско́й воды́** диңгеҙ һыуының йылыныуы

**ПОТЕПЛЕ́ТЬ** *сов. см.* **тепле́ть**; **к ве́черу потепле́ло** кискә йылытып ебәрҙе

**ПОТЕРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ыуыу, ышҡыу, ыуып (ышҡып) алыу; **потере́ть грудь** түште ыуып алыу **2.** *что, чего*; *разг.* (*натереть некоторое количество*) ҡырыу, ҡырып ҡуйыу (алыу); **потере́ть морко́вь** кишер ҡырып ҡуйыу

**ПОТЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ышҡыныу; **ко́шка потёрлась о мою́ но́гу** бесәй минең аяҡҡа ышҡынды **2.** (*протереться от трения, носки и т.п.*) ҡырылыу; **пиджа́к потёрся на локтя́х** пинжәктең терһәктәре ҡырылған

**ПОТЕРПЕ́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **потерпе́ть 2.** *в знач. сущ.* **потерпе́вший** *м* и **потерпе́вшая** *ж* зарар (зыян) күргән кеше, бәләгә тарыусы

**ПОТЕРПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* түҙеү, сыҙау, сабыр итеү; **потерпе́ть ещё немно́го** тағы әҙерәк сабыр итеү **2.** *см.* **терпе́ть** 3; **потерпе́ть неуда́чу** уңышһыҙлыҡҡа тарыу

**ПОТЁРТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **потере́ть 2.** *прил.* ҡырылған, таушалған, ҡырылып (таушалып) бөткән; **потёртый костю́м** таушалып бөткән костюм

**ПОТЕ́РЯ** *ж* **1.** юғалтыу; **поте́ря книг** китаптарҙы юғалтыу; **поте́ря созна́ния** аң юғалтыу; **убра́ть урожа́й без поте́рь** уңышты юғалтыуһыҙ йыйып алыу **2.** (*трата*) юғалтыу, тәләф; **поте́ря вре́мени** ваҡытты тәләф итеү

**ПОТЕ́РЯННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. см.* **потеря́ть 2.** *прил.* юғалып (аптырап) ҡалған; **говори́ть поте́рянным го́лосом** аптырап ҡалған тауыш менән һөйләү; **он хо́дит с поте́рянным ви́дом** ул юғалып ҡалған хәлдә (аптырап) йөрөй

**ПОТЕРЯ́ТЬ** *сов. см.* **теря́ть** ♦ **потеря́ть счёт** *см.* **счёт**

**ПОТЕРЯ́ТЬСЯ** *сов. см.* **теря́ться**

**ПОТЕСНИ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡыҫыу, ҡыҫырыҡлау, ҡыҫа (ҡыҫырыҡлай) биреү; **потесни́ть сосе́да плечо́м** күршене иңбаш менән ҡыҫа төшөү

**ПОТЕСНИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡыҫылыу, ҡыҫыла биреү, тығыҙланыу

**ПОТЕ́ТЬ** *несов.* тирләү; **лоб его́ поте́ет** маңлайы тирләй; **стёкла в о́кнах поте́ют** тәҙрә быялалары тирләй

**ПОТЕ́ХА** *ж* ҡыҙыҡ, уйын-көлкө, күңел асыу; **ра́ди поте́хи** ҡыҙыҡ өсөн; **найти́ себе́ поте́ху** үҙеңә ҡыҙыҡ табыу ♦ **пошла́ поте́ха** китте уйын-көлкө

**ПОТЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** аға башлау; **потекли́ ручьи́** гөрләүектәр аға башланы **2.** (*дать течь*) тишелеп аға башлау; **ведро́ потекло́** биҙрә аға башланы

**ПОТЕША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *чем* и *без доп.*; *уст.* (*забавляться*) күңел асыу, йыуаныу; **потеша́ться охо́той** һунар итеп күңел асыу **2.** *над кем-чем* (*подшучивать*) шаяртыу, уйнап (шаяртып) көлөү; **потеша́ться над детьми́** балаларҙы шаяртып көлөү

**ПОТЕ́ШИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* йыуатыу, күңелен асыу (аулау); **поте́шить ребя́т** балаларҙың күңелен йыуатыу

**ПОТЕ́ШИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* йыуаныу, күңел асыу (аулау)

**ПОТЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ирмәк, мәҙәк, ҡыҙыҡ; **поте́шный ребёнок** ирмәк бала

**ПОТИРА́ТЬ** *несов. что* ыуыу, ышҡыу, ыуғылау, ышҡыштырыу; **потира́ть ру́ки** ҡулдарҙы ыуғылау; **от ды́ма потира́ть глаза́** төтөндән күҙҙе ыуғылау

**ПОТИХО́НЬКУ** *нареч.*; *разг.* **1.** (*медленно*) әкренләп, аҡрынлап, яйлап; **идти́ потихо́ньку** яйлап барыу **2.** (*незаметно*) һиҙҙермәйенсә, йәшертен; **уйти́ потихо́ньку** һиҙҙермәйенсә китеү

**ПОТЛИ́ВОСТЬ** *ж* тирселлек; **повы́шенная потли́вость** саманан тыш тирселлек

**ПОТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое тирсел; **потли́вые ру́ки** тирсел ҡулдар

**ПОТНИ́К** *м* тирлек, ыңғырсаҡ кейеҙе

**ПО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*вспотевший, запотевший*) тирләгән; **по́тный лоб** тирләгән маңлай; **по́тные о́кна** тирләгән тәҙрәләр **2.** (*пропитанный потом*) тирле; **по́тная руба́шка** тирле күлдәк

**ПОТОВО́Й,** -ая, -ое тир ...ы; **потовы́е же́лезы** тир биҙҙәре

**ПОТОГО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тирләткес, тир сығарғыс; **потого́нный чай** тирләткес сәй **2.** *перен.* (*выматывающий силы*) йән тирҙе сығарғыс, хәлдән тайҙырғыс; **потого́нный труд** йән тирҙе сығарғыс хеҙмәт

**ПОТО́К** *м* **1.** ташҡын; **весе́нние пото́ки** яҙғы ташҡындар; **го́рный пото́к** тау йылғаһы ташҡыны **2.** *в разн. знач.* ағым; **возду́шный пото́к** һауа ағымы; **людско́й пото́к** кешеләр ағымы; **пото́к телегра́мм** телеграммалар ағымы; **поста́вить произво́дство на пото́к** етештереүҙе ағымға ҡуйыу; **выпускники́ одного́ пото́ка** бер ағымда уҡыуҙы тамамлаусылар; **экза́мены в два пото́ка** ике ағымда булған имтихандар

**ПОТОЛКОВА́ТЬ** *сов. с кем*; *разг.* һөйләшеп (гәпләшеп) алыу

**ПОТОЛО́К** *м* түшәм; **высо́кий потоло́к** бейек түшәм; **сво́дчатый потоло́к** көмбәҙле түшәм ♦ **с потолка́ (взять, сказа́ть и т.п.)** уйына килгәнде (алыу, әйтеү һ.б.)

**ПОТОЛО́ЧИНА** *ж* түшәм таҡтаһы

**ПОТОЛО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое түшәм ...ы; **потоло́чный свод** түшәм көмбәҙе; **потоло́чная ба́лка** түшәм өрлөгө

**ПОТОЛСТЕ́ТЬ** *сов. см.* **толсте́ть**

**ПОТО́М** *нареч.* аҙаҡ, аҙаҡтан, һуңынан, шунан; **поговори́м пото́м** аҙаҡ һөйләшербеҙ; **сказа́ть пото́м** аҙаҡтан әйтеү; **снача́ла она́ пришла́, пото́м я** тәүҙә ул килде, шунан мин

**ПОТО́МОК** *м* **1.** нәҫел, тоҡом **2.** *мн.* **пото́мки** (*будущее поколение*) киләсәк (йәш) быуын

**ПОТО́МСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое төп, сығышы менән, тоҡомдан килгән; **пото́мственный строи́тель** тоҡомдан килгән төҙөүсе

**ПОТО́МСТВО** *с* **1.** (*молодое поколение*) быуын, нәҫел, тоҡом **2.** *собир. см.* **пото́мок** 2

**ПОТОМУ́** *нареч.* **1.** шунлыҡтан, шуға күрә, шуның өсөн; **вот потому́ я и пришла́** шуға күрә мин килдем дә инде **2.** (*в составе союза "потому что"*) сөнки; **мы сильны́, потому́ что еди́ны** беҙ көслөбөҙ, сөнки берҙәмбеҙ

**ПОТОНУ́ТЬ** *сов. см.* **тону́ть**; **дере́вни потону́ли в снегу́** ауылдар ҡарға күмелгән

**ПОТОНЧА́ТЬ** *сов. см.* **тонча́ть**

**ПОТО́П** *м* **1.** (*библейский сюжет*) туфан; **наступле́ние Всеми́рного пото́па** Ер йөҙөнә туфан ҡалҡыу **2.** *разг.* ташҡын, һыу баҫыу ♦ **до пото́па** *шутл.* әллә ҡасан, борон заманда

**ПОТО́ПАТЬ** *сов.*; *разг.* тапылдатыу, тап-топ итеү, аяҡ тибеп ҡуйыу

**ПОТОПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*пустить ко дну*) (һыуға) батырыу, сумырыу; **потопи́ть неприя́тельский кре́йсер** дошман крейсерын батырыу **2.** *разг. см.* **затопи́ть** II 1

**ПОТОПЛЕ́НИЕ** *с см.* **потопи́ть** — **потопля́ть** 1

**ПОТОПЛЯ́ТЬ** *несов.*; *уст. см.* **потопи́ть**

**ПОТОПТА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тапау, тапап бөтөрөү; **потопта́ть траву́** үләнде тапау **2.** *см.* **топта́ть** 5

**ПОТОРА́ПЛИВАТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* ҡабаландырыңҡырау, ашыҡтырыңҡырау, ҡабаландыра төшөү, йәһәтләү

**ПОТОРА́ПЛИВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* ҡабаланыңҡырау, ашығыңҡырау, ашыға (ҡабалана) төшөү

**ПОТОРГОВА́ТЬ** *сов.* бер аҙ сауҙа итеү, сауҙа (һатыу) итеп алыу

**ПОТОРГОВА́ТЬСЯ** *сов.* әҙерәк (бер аҙ) һатыулашыу (сауҙалашыу)

**ПОТОРОПИ́ТЬ** *сов. см.* **торопи́ть** 1

**ПОТОРОПИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **торопи́ться**

**ПОТОЧИ́ТЬ** *несов.* бер аҙ ҡайрау, әҙерәк сарлау, үткерләп алыу

**ПОТО́ЧНОСТЬ** *ж*; *спец.* ағымлылыҡ; **пото́чность технологи́ческого проце́сса** технологик процестың ағымлылығы

**ПОТО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое (*конвейерный*) ағым(лы), өҙлөкһөҙ, бер-бер артлы; **пото́чный ме́тод** ағым ысулы (*эшләп сығарыуҙа*)

**ПОТРА́ВА** *ж* тапау, тапатыу, малдан ашатыу (*ашлыҡты һ.б.*); **не допуска́ть потра́вы хлебо́в** ашлыҡты тапауға юл ҡуймау

**ПОТРАВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **трави́ть** I 2; **2.** *кого-что*; *разг.* (*отравить*) ағыулау, ағыулап үлтереү, ағыулап үлтереп бөтөрөү **3.** *кого* (*некоторое время преследовать*) эҙәрләү; (*о человеке*) яла яғыу, юрамал бәйләнеү **4.** *что* бөтөрөү; **потрави́ть пя́тна на тка́ни** туҡымалағы таптарҙы бөтөрөү

**ПОТРА́ТИТЬ** *сов. см.* **тра́тить**; **потра́тить все де́ньги** бөтә аҡсаны тотоноп бөтөү

**ПОТРА́ТИТЬСЯ** *сов.* тотоноу, тотолоп бөтөү, аҡса сарыф итеү

**ПОТРА́ФИТЬ** *сов. кому-чему*; *прост.* күңелен табыу, көйөн күреү, ярау

**ПОТРЕБИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** ҡулланыусы, тотоноусы **2.** (*покупатель*) һатып алыусы

**ПОТРЕБИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡулланыу …ы ♦ **потреби́тельная сто́имость** *эк.* (әйберҙең) ҡулланыу хаҡы

**ПОТРЕБИ́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое **1.** ҡулланыусылар …ы, потребителдәр …ы, һатып алыусылар …ы; **потреби́тельское о́бщество** потребителдәр йәмғиәте **2.** *перен., неодобр.* үҙ ихтыяждарын ғына ҡәнәғәтләндереүгә ынтылыусан

**ПОТРЕБИ́ТЬ** *сов. см.* **потребля́ть**

**ПОТРЕБЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **потреби́ть — потребля́ть**; **потребле́ние воды́** һыу тотоноу **2.** *эк.* ҡулланыу, тотоноу, файҙаланыу; **ли́чное потребле́ние** шәхси ҡулланыу (тотоноу); **това́ры широ́кого потребле́ния** киң ҡулланыу тауарҙары

**ПОТРЕБЛЯ́ТЬ** *несов. что* ҡулланыу, тотоноу, файҙаланыу; **потребля́ть электроэне́ргию** электр энергияһын ҡулланыу

**ПОТРЕ́БНОСТЬ** *ж* **1.** (*надобность*) ихтыяж, талап, кәрәклек, хәжәт; **увеличе́ние потре́бностей** ихтыяж артыу; **удовлетвори́ть потре́бности** талаптарҙы ҡәнәғәтләндереү **2.** (*желание, стремление*) теләк, ынтылыш; **потре́бность рабо́тать** эшләргә теләк

**ПОТРЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое кәрәкле, зарур, хәжәт

**ПОТРЕ́БОВАТЬ** *сов. см.* **тре́бовать** 1, 3

**ПОТРЕ́БОВАТЬСЯ** *сов. см.* **тре́боваться** 1, 2; **на э́ту рабо́ту потре́буется два дня** *безл.* был эшкә ике көн кәрәк булыр

**ПОТРЕВО́ЖИТЬ** *сов. кого-что* **1.** борсоу, тынысһыҙлау, мәшәҡәтләү **2.** *см.* **трево́жить** 3

**ПОТРЕВО́ЖИТЬСЯ** *сов.* борсолоу, тынысһыҙланыу, мәшәҡәтләнеү

**ПОТРЁПАННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **потрепа́ть 2.** *прил.* (*истрёпанный*) тетелгән, ойпаланған, ылбыраған, ылйыраған, күп кейелгән **3.** *прил.*; *перен.* (*изнурённый*) таушалған, бирешкән, йонсоған; **потрёпанный вид** йонсоған ҡиәфәт

**ПОТРЕПА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* (*истрепать*) туҙҙырыу, туҙҙырып бөтөрөү, таушалдырыу; **потрепа́ть пальто́** пальтоны туҙҙырып бөтөрөү **2.** *кого-что* ҡаҡҡылау, һыйпау; **потрепа́ть по щеке́** яңағынан ҡаҡҡылап алыу **3.** *что*; *с.-х.* тәрәпләү, тәрәпләп бөтөү; **потрепа́ть лён** етенде тәрәпләү

**ПОТРЕПА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** туҙыу, туҙып (таушалып) бөтөү **2.** тел сарлап алыу, гәпләшеү

**ПОТРЕ́СКАТЬСЯ** *сов. см.* **тре́скаться**; **от хо́лода потре́скались ру́ки** һыуыҡҡа ҡул ярылды

**ПОТРЕ́СКИВАТЬ** *несов. чем* и *без доп.* сытырлатыу, сырт-сырт итеү, сырт-сырт итеп ҡуйыу, сытыр-сытыр килеү; **дрова́ потре́скивают в пе́чке** утын мейестә сырт-сырт итеп яна

**ПОТРО́ГАТЬ** *сов. кого-что* һәрмәү, ҡапшап ҡарау, тейеү

**ПОТРОХА́** *только мн.* эс-ҡарын, эсәк-бауыр, эсәк-ҡарын (*малдың, ҡоштоң ҵпкә-бауыры, эсәк-ҡарыны һ.б.*) ♦ **со все́ми потроха́ми** *прост.* башы-тояғы менән

**ПОТРОШИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*очищать от внутренностей*) (эсен ярып) таҙартыу (йыуыу); **потроши́ть ры́бу** балыҡты таҙартыу **2.** *что*; *перен., разг.* (*извлекать содержимое*) эсен аҡтарыу, аҡтарып ташлау (алыу)

**ПОТРУДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** эшләү, көс һалыу, хеҙмәт итеү **2.** *с неопр.* (*счесть возможным сделать что-л.*) кәрәкле һанау, иренмәү, әле, -сы/-се; **да́же не потруди́лся предупреди́ть** алдан хәбәр итеп тә торманы **3.** *повел.* **потруди́(те)сь** кәрәкле һанау, әле, -сы/-се; **потруди́тесь переда́ть** тапшырығыҙсы

**ПОТРЯСА́ТЬ** *несов. см.* **потрясти́** 2—4

**ПОТРЯСА́ЮЩЕ** *нареч.* хәтәр, иҫ киткес, хайран (таң) ҡалырлыҡ, тетрәндергес; **расска́зывать потряса́юще** хәтәр һөйләү

**ПОТРЯСА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **потряса́ть 2.** *прил.* (*крайне волнующий*) хайран (таң) ҡалырлыҡ, иҫ киткес, тетрәндергес, хәтәр; **потряса́ющий успе́х** хайран ҡалырлыҡ уңыш

**ПОТРЯСЕ́НИЕ** *с* **1.** көслө тулҡынланыу, ауыр кисереш; **душе́вное потрясе́ние** ауыр рухи кисереш **2.** (*коренная ломка*) нигеҙенән (тамырынан) үҙгәртеү

**ПОТРЯСЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **потрясти́ 2.** *прил.* (*крайне удивлённый*) хайран ҡалған, шаҡ ҡатҡан, тетрәнгән

**ПОТРЯСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что, чем* ҡағыу, һелкетеү; **потрясти́ ковёр** келәм ҡағыу; **потрясти́ я́блоню** алмағасты һелкетеү **2.** *что* (*заставить сотрясаться*) тетрәтеү, дер һелкетеү **3.** *что*; *перен.* (*пошатнуть*) ҡаҡшатыу **4.** *кого-что*; *перен.* (*взволновать*) ғәжәпкә ҡалдырыу, хайран ҡалдырыу, тетрәтеү; **э́то собы́тие потрясло́ всех** был ваҡиға бөтәһен дә тетрәтте

**ПОТРЯ́ХИВАТЬ** *несов. кого-что, чем*; *разг.* һелкkeләү, ҡаҡҡылау, һелкkeләп алыу

**ПОТУ́ГИ** *мн.* (*ед.* **потуга** *ж*) **1.** (*сокращение мышц*) көсәнеү, асырғаныу, тулғаҡ; **родовы́е поту́ги** тулғаҡ тотоу **2.** *перен., неодобр.* көсәнеү, көсәнеп маташыу, тырышыу; **поту́ги на остроу́мие** тапҡыр һөйләргә көсәнеү

**ПОТУЖИ́ТЬ** *сов. о ком-чём*; *разг., трад.-поэт.* ҡайғырып алыу (ҡуйыу)

**ПОТУ́ПИТЬ** *сов. что* (*голову*) башты түбән эйеү, башты төшөрөү; (*глаза*) аҫҡа ҡарау, түбән ҡарау

**ПОТУ́ПИТЬСЯ** *сов.* (*о голове*) башты түбән эйеү, башты эйеп тороу; (*о глазах*) аҫҡа ҡарап тороу, түбән ҡарау

**ПОТУПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **поту́пить**

**ПОТУПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **поту́питься 2.** *страд. от* **потупля́ть**

**ПОТУСКНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** тоноҡланған, төҫө киткән, ялтырауығы бөткән; **потускне́лое серебро́** ялтырауығы бөткән көмөш **2.** *перен.*

һүнгән, һүнек, тоноҡ, дәртһеҙ; **потускнéлый взор** һүнгән ҡараш

**ПОТУСКНÉНИЕ** *с см.* **потускнéть**

**ПОТУСКНÉТЬ** *сов. см.* **тускнéть**; **звёзды на нéбе потускнéли** күктәге йондоҙҙар тоноҡланды; **взор её потускнéл** уның күҙ ҡарашы һүнгән

**ПОТУСТОРÓННИЙ,** -яя, -ее теге донъя ...ы, Ерҙә булмаған; **потусторóнние сѝлы** теге донъя көстәре

**ПОТУХÁНИЕ** *с см.* **потухáть**

**ПОТУХÁТЬ** *несов. см.* **потýхнуть**

**ПОТÝХНУТЬ** *сов.* **1.** һүнеү, һүнеп китеү (ҡуйыу); **лáмпа потýхла** шәм һүнде **2.** *перен.* (*прекратиться*) һүнеү, бөтөү, баҫылыу; **враждá потýхла** дошманлашыу бөттө

**ПОТÝХШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **потýхнуть** **2.** *прил.* үле, һүнгән; **потýхший взгляд** һүнгән ҡараш

**ПОТУЧНÉТЬ** *сов. см.* **тучнéть**

**ПОТУШѝТЬ I** *сов. см.* **тушѝть** I; **потушѝть лáмпу** шәмде һүндереү

**ПОТУШѝТЬ II** *сов. что* (*тушить некоторое время*) быҡтырыу, (томалап) бешереү; **потушѝть мя́со** итте томалап бешереү

**ПÓТЧЕВАТЬ** *несов. кого, чем*; *прост.* һыйлау, ҡыҫтап һыйлау

**ПОТЯГÁТЬСЯ** *сов. см.* **тягáться** 1

**ПОТЯ́ГИВАНИЕ** *с см.* **потя́гивать**, **потя́гиваться**

**ПОТЯ́ГИВАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *см.* **тянýть** 1—3, 5, 7; **потя́гивать верёвку** бауҙы тартып-тартып ҡуйыу **2.** *что* (*пить понемногу*) әҙләп-әҙләп эсеү **3.** *что* (*неторопливо курить*) яйлап тәмәке һурыу, көйрәтеү

**ПОТЯ́ГИВАТЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **тянýться** 2

**ПОТЯЖЕЛÉТЬ** *сов. см.* **тяжелéть**

**ПОТЯНÝТЬ** *сов.* **1.** (*начать тянуть*) *см.* **тянýть** 1—6, 8—10; **потянýть за рукáв** еңенән тартыу **2.** *кого*; *разг.* эйәртеп алып китеү, саҡырыу, һөйрәү, эйәртеү; **потянýть на лéкцию** лекцияға эйәртеп алып китеү **3.** *разг.* тартыу, килеү; **кýрица потянýла на два килогрáмма** тауыҡ ике килограмм тартты **4.** *безл.* иҫә башлау, килеү, аңҡыу (*о ветре*, *тепле*, *холоде*, *запахе*); **потянýло ды́мом** төтөн еҫе менән аңҡыны

**ПОТЯНÝТЬСЯ** *сов.* **1.** (*начать тянуться*) *см.* **тянýться** 3—8; **потянýться чéрез стол** өҫтәл аша һонолоу; **за нáми потянýлись другѝе** беҙҙең арттан башҡалар эйәрҙе; **впередѝ потянýлись лугá** алда болондар һуҙылып китә; **потянýлись скýчные дни** күңелһеҙ көндәр башланды **2.** *см.* **тянýться** 2; **потянýться в постéли** урында кирелеү

**ПОУБÁВИТЬ** *сов. что*, *чего*; *разг.* әҙерәк кәметеү, кәметә төшөү (биреү), аҡрынайтыу

**ПОÝЖИНАТЬ** *сов. см.* **ýжинать**

**ПОУМНÉТЬ** *сов. см.* **умнéть**

**ПОУПРАЖНЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күнекмәләр эшләп алыу, күнегеүҙәр яһау

**ПОУРÓЧНЫЙ,** -ая, -ое дәрес ...ы, дәрес иҫәбенән; **поурóчная оплáта** дәрес иҫәбенән түләү; **поурóчный план** дәрес планы

**ПОУСÉРДСТВОВАТЬ** *сов.*; *разг.* тырышыу, тырышлыҡ күрһәтеү

**ПОУТРÝ** *нареч.*; *разг.* иртә менән, иртәнсәк, иртүк; **поéхать рáно поутрý** иртә менән (иртүк) китеү

**ПОУЧÁТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* **1.** (*учить чему-л.*) өйрәтеү, кәңәш биреү **2.** (*наставлять*) өгөтләү, өгөт-нәсихәт биреү, аҡыл өйрәтеү

**ПОУЧÉНИЕ** *с* **1.** *см.* **поучáть** **2.** (*наставление*) өгөтләү, өгөт биреү **3.** *лит.*, *церк.* (*сочинение*, *речь с наставлениями о жизни*) өгөт, нәсихәт

**ПОУЧѝТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*служащий уроком*) ғибрәтле, һабаҡ (ғибрәт) булырлыҡ **2.** (*поучающий*) фәһемле, файҙалы; **поучѝтельная скáзка** фәһемле әкиәт **3.** өгөтләгән, өгөтләү ...ы; **поучѝтельный тон** өгөтләү тоны

**ПОХÁБНЫЙ,** -ая, -ое *прост.* оятһыҙ, әҙәпһеҙ, бысраҡ телле

**ПОХÁБЩИНА** *ж*; *прост.* әҙәпһеҙлек, оятһыҙлыҡ, әшәке һүҙ

**ПОХÁЖИВАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** (*ходить туда и обратно*) йөрөштөрөү, йөрөп тороу, йөрөгөләү **2.** (*время от времени приходить куда-л.*) килеп (килгеләп) йөрөү, килгеләштереү, ингеләү

**ПОХВАЛÁ** *ж* маҡтау, алҡыш, алҡышлау; **отозвáться с похвалóй** маҡтап һөйләү; **заслужѝть похвалý** маҡтауға лайыҡ булыу

**ПОХВÁЛИВАТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* маҡташтырыу, маҡтап-маҡтап алыу

**ПОХВАЛѝТЬ** *сов. кого-что* маҡтап ебәреү (ҡуйыу)

**ПОХВАЛѝТЬСЯ** *сов.* маҡтаныу, маҡтанып алыу (ҡуйыу)

**ПОХВАЛЬБÁ** *ж* **1.** *разг. неодобр.* маҡтансыҡлыҡ, шапырыныусанлыҡ, ҡуҡырлыҡ **2.** *см.* **похвалá**

**ПОХВÁЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*содержащий похвалу*) маҡтау ...ы; **похвáльный лист** маҡтау ҡағыҙы **2.** (*достойный похвалы*) маҡтаулы, маҡтауға лайыҡ, маҡтарлыҡ; **похвáльное дéло** маҡтарлыҡ эш

**ПОХВАЛЯ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* маҡтаныу, маҡтанып йөрөү

**ПОХВÁРЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* ауырыбыраҡ (сирләберәк) тороу, ауырыштырыу, сирләштереү

**ПОХВÁСТАТЬ** *сов. см.* **хвáстать**

**ПОХВÁСТАТЬСЯ** *сов. см.* **хвáстаться**; **не могý похвáстаться** маҡтана алмайым

**ПОХВОРÁТЬ** *сов.*; *разг.* ауырып (сирләп) алыу, сирләү

**ПОХИТѝТЕЛЬ** *м* и **ПОХИТѝТЕЛЬНИЦА** *ж* урлаусы, сәлдереүсе

**ПОХИ́ТИТЬ** *сов. кого-что* урлап алып китеү, урлау, аяҡландырыу, сәлдереү

**ПОХИХИ́КАТЬ** *сов.*; *разг.* хихылдау, хихылдап көлөү (алыу)

**ПОХИЩА́ТЬ** *несов. см.* **похи́тить**

**ПОХИЩЕ́НИЕ** *с см.* **похи́тить — похища́ть**; **похище́ние де́вушки** ҡыҙ урлау

**ПОХЛЕБА́ТЬ** *несов. что* и *без доп*; *разг.* ашап (эсеп) алыу

**ПОХЛЁБКА** *ж* шыйыҡ аш

**ПОХЛЕСТА́ТЬ** *несов.* (*некоторое время хлестать*) *см.* **хлеста́ть** 1—3

**ПОХЛО́ПАТЬ** *сов.* **1.** *см.* **хло́пать**; **похло́пать по плечу́** иңбашынан ҡаҡҡылау **2.** ҡул сабыу (сабып алыу), сәпәкәйләү

**ПОХЛОПОТА́ТЬ** *сов.* **1.** юллау, артынан йөрөү, хәстәрләү; **похлопота́ть о де́ле** эш тураһында йөрөү **2.** *о чём* (*стараться добиться чего-л.*) хәстәрлек итеү, хәстәрләү, тырышыу, ҡайғыртыу **3.** мәшәкәтләнеү, мәшәкәтләнеп (маташып) йөрөү; **похлопота́ть по хозя́йству** йорт эштәре менән мәшәкәтләнеп йөрөү

**ПОХЛО́ПЫВАТЬ** *несов. кого-что* ҡаҡҡылау, тапау, ҡағыу; **похло́пывать по спине́** арҡанан ҡағыу

**ПОХМЕ́ЛЬЕ** *с* эскелек зәле, баш төҙәтеү ♦ **в чужо́м пиру́ похме́лье** ҡара эт бәләһе — аҡ эткә

**ПОХО́Д I** *м* **1.** (*передвижение группы людей с определённой целью*) поход; **лы́жный похо́д** саңғы походы; **отпра́виться в похо́д** походҡа сығыу **2.** (*военная кампания*) поход, һуғыш хәрәкәттәре; **кресто́вые похо́ды** тәре походтары **3.** *перен.* (*действия по борьбе с чем-л.*) көрәш

**ПОХО́Д II** *м*; *разг.* (*излишек в весе, сумме, и т.п.*) артығы; **три килогра́мма с похо́дом** артығы менән өс килограмм

**ПОХОДА́ТАЙСТВОВАТЬ** *сов. о ком-чём*, *за кого* юллау, артынан йөрөү, хәстәрләү

**ПОХОДИ́ТЬ I** *сов.* (*ходить некоторое время*) йөрөп тороу (килеү), йөрөштөрөп алыу; **походи́ть по го́роду** ҡала буйлап йөрөп килеү

**ПОХОДИ́ТЬ II** *несов. на кого-что* (*быть похожим*) оҡшау, оҡшап тороу; **походи́ть на мать** әсәйгә оҡшау

**ПОХО́ДКА** *ж* йөрөш, атлау, аҙым; **ста́рческая похо́дка** ҡарттар йөрөшө; **лёгкая похо́дка** еңел атлау

**ПОХО́ДНЫЙ**, -ая, -ое **1.** поход ...ы; **похо́дная пе́сня** поход йыры; **похо́дным поря́дком** поход тәртибе менән **2.** (*передвижной*) походтағы, күсмә; **похо́дная ку́хня** походтағы кухня; **похо́дная радиоста́нция** күсмә радиостанция

**ПО́ХОДЯ** *нареч.*; *разг.* **1.** (*поспешно, торопливо*) аяҡ өҫтө, аяҡ үрә, баҫып торған килеш; **заку́сывать по́ходя** аяҡ өҫтө йөрөп ашау **2.** (*заодно, мимоходом*) эш араһында ғына, ашыҡ-бошоҡ, тиҙ-тиҙ генә; **реша́ть всё по́ходя** бөтә мәсьәләләрҙе эш араһында ғына хәл итеү

**ПОХОЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *уст.* (*путешествие*) сәйәхәт, ил гиҙеү **2.** *обычно мн.* **похожде́ния** баштан үткән хәл, күргәндәр, мажаралар

**ПОХО́ЖЕ 1.** *нареч.* булһа кәрәк; **звучи́т похо́же** ишетелә булһа кәрәк **2.** *в знач. сказ.*; *разг.* -ға/-гә оҡшай, күрәһең, булһа кәрәк; **похо́же на то, что бу́дет дождь** ямғыр булырға оҡшаған **3.** в *знач. вводн. сл.* -ға/гә оҡшай, булһа кәрәк, буғай, ахыры(һы); **они́, похо́же, не приду́т** улар килмәҫ, ахыры; улар килмәҫкә оҡшай; **де́ти, похо́же, лю́бят её** балалар уны ярата буғай

**ПОХО́ЖИЙ**, -ая, -ее (*имеющий сходство с кем-чем-л.*) оҡшаш, оҡшаған, тартым; **быть похо́жим** оҡшаш булыу; **похо́жие лю́ди** оҡшаш (бер-береһенә оҡшаған) кешеләр; **похо́жая на байт пе́сня** бәйеткә тартым йыр; **ты похо́жа на него́** һин уға оҡшағанһың ♦ **ни на что не похо́же** бер нәмәгә лә ярамаған, бик насар

**ПОХОЗЯ́ЙНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* бер аҙ хужа булып алыу, әҙерәк хужалыҡ итеү

**ПОХОЛОДА́НИЕ** *с см.* **похолода́ть**

**ПОХОЛОДА́ТЬ** *сов. см.* **холода́ть**; **но́чью похолода́ло** төнөн һыуытты

**ПОХОЛОДЕ́ТЬ** *сов. см.* **холоде́ть**; **во́здух похолоде́л** һауа һалҡынайҙы; **похолоде́ть от у́жаса** ҡурҡыуҙан ҡатып ҡалыу

**ПОХОРОНИ́ТЬ** *сов. см.* **хорони́ть**

**ПОХОРО́НКА** *ж*; *прост. см.* **похоро́нный** 3

**ПОХОРО́ННЫЙ**, -ая, -ое **1.** күмеү ...ы, ерләү ...ы, матәм ...ы; **похоро́нное бюро́** ерләү бюроһы; **похоро́нный марш** матәм маршы **2.** *перен.*, *разг.* (*печальный*, *скорбный*) ҡайғылы, хәсрәтле, бойоҡ **3.** *в знач. сущ.* **похоро́нная** *ж*; *разг.* үлеү тураһындағы ҡағыҙ, ҡара ҡағыҙ

**ПО́ХОРОНЫ** *мн.* мәйетте күмеү, ерләү; **торже́ственные по́хороны** тантаналы ерләү

**ПО-ХОРО́ШЕМУ** *нареч.*; *разг.* яҡшылыҡ менән, татыулыҡ менән, яҡшы сағында

**ПОХОРОШЕ́ТЬ** *сов.* төҫ(ө) сығыу, яҡшырыу, матурланыу, матурланып китеү

**ПОХОТЛИ́ВОСТЬ** *ж* енси аҙғынлыҡ

**ПОХОТЛИ́ВЫЙ**, -ая, -ое аҙғын нәфселе, енси теләкле, шәһүәтле

**ПО́ХОТЬ** *м* енси теләк, аҙғын нәфсе

**ПОХОХОТА́ТЬ** *сов.* шарҡылдап (ҡысҡырып) көлөү

**ПОХРА́ПЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* хырылдау, ғырылдау, хырылдап (ғырылдап) алыу

**ПОХРУ́СТЫВАТЬ** *несов.* (еңелсә) шытырлау, шығырлау, шығыр-шығыр килеү, мыртылдатыу

**ПОХУДЕ́ТЬ** *сов. см.* **худе́ть**; **похуде́ть от боле́зни** ауырыуҙан һурығыу

**ПОЦАРА́ПАТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*царапнуть несколько раз*) тырнап (сыйып) алыу, тырнау **2.** (*слегка поранить*) сыйҙыртыу, һыҙыртыу; **поцара́пать себе́ ру́ку** ҡулды сыйҙыртыу

**ПОЦАРА́ПАТЬСЯ** *сов.* **1.** (*слегка оцарапаться*) тырналыу, сыйылыу; **поцара́паться о про́волоку** тимерсыбыкҡа сыйылыу **2.** (*покрыться царапинами*) һыҙырылыу, сыйылып бөтөү; **шкаф при перево́зке поцара́пался** күсергәндә шкаф һыҙырылып бөткән

**ПОЦЕЛОВА́ТЬ** *сов. см.* **целова́ть**

**ПОЦЕЛОВА́ТЬСЯ** *сов. см.* **целова́ться**

**ПОЦЕЛУ́Й** *м* үбеү, үбеш; **не́жный поцелу́й** наҙлы үбеү

**ПОЧАСОВИ́К** *м* сәғәтләп эшләүсе (*сәғәт иҫәбенән эш хаҡы ала торған уҡытыусы*)

**ПОЧАСОВО́Й,** -ая, -ое сәғәтләп, сәғәтле; **почасова́я рабо́та** сәғәтле эш

**ПОЧА́ТОК** *м*; *бот.* сәкән, сәкән баш; **поча́ток кукуру́зы** кукуруз сәкәне

**ПОЧА́ЩЕ** *нареч.*; *разг.* йышыраҡ

**ПО́ЧВА** *ж* **1.** тупраҡ, ер; **вы́щелоченные по́чвы** эзбизе йыуылған тупраҡ; **подзо́листая по́чва** көлһыу тупраҡ; **плодоро́дие по́чвы** тупраҡтың уңдырышлығы **2.** *перен.* (*основание*) нигеҙ, ерлек, төп; **подгото́вить по́чву** ерлек әҙерләү; **на по́чве ре́вности** көнләшеү нигеҙендә ♦ **по́чва ухо́дит из-под ног** *чьих*, *у кого* таяныс юғала, эш-хәл мөшкөлләнә; **прощу́пать по́чву** тикшереп ҡарау, ҡылын тартып ҡарау

**ПО́ЧВЕННО-КЛИМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *спец.* тупраҡ-климат ...ы; **по́чвенно-климати́ческие усло́вия** тупраҡ-климат шарттары

**ПО́ЧВЕННЫЙ,** -ая, -ое тупраҡ ...ы, ер ...ы; **по́чвенный покро́в** тупраҡ ҡапламы

**ПОЧВОВЕ́Д** *м* тупраҡты өйрәнеүсе ғалим, тупраҡ белгесе

**ПОЧВОВЕ́ДЕНИЕ** *с* тупраҡ тураһындағы фән, тупраҡ буйынса ғилем

**ПОЧВОЗАЩИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое тупраҡ һаҡлау ...ы, тупраҡ һаҡлай торған; **почвозащи́тное насажде́ние** тупраҡ һаҡлай торған үҫенте

**ПОЧВООБРАБА́ТЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее тупраҡ эшкәртеү ...ы, тупраҡ эшкәртә торған; **почвообраба́тывающие маши́ны** тупраҡ эшкәртеү машиналары

**ПОЧВООБРАЗОВА́НИЕ** *с*; *спец.* тупраҡ барлыҡҡа килеү

**ПОЧЁМ** *нареч.*; *разг.* ни хаҡ, күпме тора ♦ **узна́ть, почём фунт ли́ха** *см.* **фунт**

**ПОЧЕМУ́** *нареч.* **1.** ни өсөн, ниңә, нишләп; **почему́ она́ не пришла́?** ул ниңә килмәне? **2.** шуға күрә, -лыҡтан/-лектән; **она́ забы́ла а́дрес, почему́ и не писа́ла** ул адресты оноткан, шуға күрә лә хат яҙмаған **3.** нилектән; **вот почему́ они́ до́лго не приходи́ли** бына нилектән улар оҙаҡ килмәй торғандар

**ПОЧЕМУ́-ЛИБО** и **ПОЧЕМУ́-НИБУДЬ** *нареч.* ниндәй ҙә булһа бер сәбәп менән, ниндәйҙер бер сәбәп арҡаһында, ниңәлер

**ПОЧЕМУ́-ТО** *нареч.* әллә нишләп, нишләптер, ниңәлер, әллә ниңә; **почему́-то мы не встре́тились** беҙ нишләптер осраша алманыҡ

**ПО́ЧЕРК** *м* яҙыу, (ҡулдан) яҙыу рәүеше; **у неё хоро́ший по́черк** уның яҙыуы матур; **неразбо́рчивый по́черк** таный алмаҫлыҡ ҡул яҙыуы

**ПОЧЕРНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое ҡарайған, ҡарайып бөткән, ҡара төҫкә ингән

**ПОЧЕРНЕ́ТЬ** *сов. см.* **черне́ть** 2

**ПОЧЕРНИ́ТЬ** *сов. что* ҡаралау, ҡарайтыу, ҡараға буяу

**ПОЧЕРПА́ТЬ** *несов. см.* **почерпну́ть** 2

**ПОЧЕРПНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что*, *чего*; *разг.* алыу, сумырып (һоҫоп) алыу; **почерпну́ть воды́ из коло́дца** ҡоҙоҡтан һыу алыу **2.** *что*; *перен.* (*позаимствовать*) алыу, файҙаланыу; **почерпну́ть све́дения из книг** китаптарҙан мәғлүмәт алыу

**ПОЧЕРСТВЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ҡатыу, кибеү, иҫкереү; **хлеб почерстве́л** икмәк иҫкергән **2.** туңыу, күңел ҡатыу, ҡаты күңелләнеү

**ПОЧЕСА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тырнау, тырнап алыу; **почеса́ть ру́ку** ҡулды тырнау **2.** *что* (*очистить*) тарау, тетеү; **почеса́ть лён** етен тарау ♦ **почеса́ть язы́к** *см.* **чеса́ть**

**ПОЧЕСА́ТЬСЯ** *сов.* (*чесаться некоторое время*) әҙерәк ҡысытыу, ҡысытып ҡуйыу, тырнанып алыу, тырнаныу; **соба́ка почеса́лась** эт тырнанып алды

**ПО́ЧЕСТИ** *мн.* (*ед.* **по́честь** *ж*) ҙурлау, хөрмәт (итеү), ҡәҙер итеү; **встреча́ть с по́честями** ҙурлап (хөрмәтләп) ҡаршылау; **ока́зывать по́чести** хөрмәт күрһәтеү

**ПОЧЕ́СТЬ** *сов. кем-чем, за кого-что*; *уст.* тип таныу (һанау, иҫәпләү); **она́ почла́ э́то свои́м до́лгом** ул быны үҙенең бурысы тип иҫәпләне

**ПОЧЕСУ́ХА** *ж*; *мед.* ҡысытма (*йоғошло булмаған тире ауырыуы*)

**ПОЧЁСЫВАТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* тырнап-тырнап ҡуйыу (алыу), тырнаштырыу

**ПОЧЁСЫВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* тырнаныу

**ПОЧЁТ** *м* хөрмәт, ихтирам(лау), ҡәҙерхөрмәт; **орден “Знак Почёта”** “Хөрмәт билдәһе” ордены; **ока́зывать почёт** ихтирам күрһәтеү ♦ **быть в почёте** ихтирам ителеү, ҡәҙер-хөрмәттә булыу

**ПОЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** хөрмәтле, ҡәҙерле, арҙаҡлы; **почётный гость** ҡәҙерле ҡунаҡ **2.** (*являющийся знаком почёта*) хөрмәтле, почётлы, почёт ...ы, хөрмәт ...ы; **почётный прези́диум** почётлы президиум; **почётный акаде́мик** почётлы академик; **почётный карау́л** хөрмәт ҡарауылы; **почётная гра́мота** хөрмәт грамотаһы **3.** (*делающий честь кому-л.*) маҡтаулы; **почётная обя́занность** маҡтаулы бурыс

**ПО́ЧЕЧНЫЙ I,** -ая, -ое *бот.*, *биол.* бөрө ...ы; **по́чечная чешуя́** бөрө ҡабығы

**ПО́ЧЕЧНЫЙ II,** -ая, -ое *анат.*, *мед.* бөйөр ...ы, бөйөргә ҡағылышлы; **по́чечные ка́мни** бөйөр таштары

**ПОЧИВА́ТЬ** *несов.*; *уст.* **1.** (*спать*) йоҡлау, йоҡлап ятыу **2.** (*покоиться — о мёртвых*) ҡәберҙә ятыу

**ПОЧИ́ВШИЙ,** -ая, -ее *высок.* үлгән, вафат булған

**ПОЧИ́Н** *м* **1.** (*начало чего-л.*) эш башы, башланғыс, башлап ебәреү; **для почи́на** башлар өсөн **2.** (*инициатива*) башланғыс, башлау, почин; **сме́лый почи́н** ҡыйыу башланғыс; **поддержа́ть почи́н рабо́чих** эшселәрҙең башланғысын күтәреп алыу; **це́нный почи́н** кәрәкле башланғыс

**ПОЧИНИ́ТЬ** *сов. что* төҙәтеү, йүнәтеү, ямау; һипләү (*йортто*); **почини́ть часы́** сәғәт төҙәтеү; **почини́ть пла́тье** күлдәк ямау

**ПОЧИ́НКА** *ж см.* **почини́ть**; **почи́нка о́буви** аяҡ кейемен ямау

**ПОЧИ́НОЧНЫЙ,** -ая, -ое ямау-төҙәтеү ...ы; **почи́ночная мастерска́я** ямау-төҙәтеү оҫтаханаһы

**ПОЧИ́СТИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* таҙартыу, таҙартып алыу; **почи́стить ту́фли** туфлиҙы таҙартып алыу **2.** *что, чего; разг.* (*освободить от шелухи, кожуры и т.п.*) әрсеү, таҙартыу; **почи́стить я́блоко** алманың ҡабығын әрсеү

**ПОЧИ́СТИТЬСЯ** *сов.* таҙартыныу, таҙартынып алыу

**ПОЧИТА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое арҙаҡлы, ололоҡло, хөрмәтле; **почита́емый челове́к** арҙаҡлы кеше; **быть почита́емым наро́дом** халыҡ тарафынан хөрмәт ителеү

**ПОЧИТА́НИЕ** *с см.* **почита́ть** II

**ПОЧИТА́ТЕЛЬ** *м* и **ПОЧИТА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* ололаусы, хөрмәтләүсе, ихтирам итеүсе

**ПОЧИТА́ТЬ I** *сов. что* и *без доп.* **1.** (*читать некоторое время*) уҡыу, уҡып алыу, бер аҙ уҡыу; **почита́ть в доро́ге** юлда барғанда бер аҙ уҡыу **2.** *разг.* (*читая, ознакомиться с содержанием*) уҡыу, уҡып алыу, уҡып ҡарау

**ПОЧИТА́ТЬ II** *несов. кого-что* (*чтить*) ололау, хөрмәтләү, арҙаҡлау, хөрмәт (ихтирам) итеү

**ПОЧИТА́ТЬ III** *несов. см.* **поче́сть**

**ПОЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. что; разг.* уҡыштырғылау, уҡыштырыу, бер аҙ уҡып алыу

**ПОЧИ́ТЬ** *сов.; высок.* (*умереть*) үлеү, вафат булыу, мәрхүм булыу ♦ **почи́ть на ла́врах** ирешелгән уңыштарға ҡәнәғәт булып ятыу

**ПОЧИ́ЩЕ** *нареч.; разг.* таҙараҡ, яҡшыраҡ, артығыраҡ

**ПО́ЧКА I** *ж; бот., биол.* бөрө, көсөк; **по́чка и́вы** тал бөрөһө (көсөгө); **боковы́е по́чки** ян бөрөләр; **спя́щие по́чки** тын бөрөләр

**ПО́ЧКА II** *ж см.* **по́чки**

**ПО́ЧКИ** *мн.* (*ед.* **по́чка** *ж* ); *анат.* бөйөр; **боле́знь по́чек** бөйөр ауырыуы

**ПОЧКОВА́НИЕ** *с; биол.* бөрөләнеү (*вегетатив үрсеүҙең бер төрө*), бөрөнән үрсеү

**ПОЧКОВА́ТЬСЯ** *несов.; биол.* бөрөләнеү, бөрөләнеп үрсеү, көсөкләү

**ПОЧКОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое бөрө һымаҡ, бөрө формаһында булған

**ПОЧКОЕ́Д** *м* бөрө ашаусы, бөрө ҡорто

**ПО́ЧТА** *ж* **1.** *в разн. знач.* почта; **пойти́ на по́чту** почтаға барыу; **отпра́вить посы́лку по́чтой** посылканы почта менән ебәреү; **у́тренняя по́чта** иртәнге почта **2.** (*то, что доставляется учреждением связи*) почта, килгән хат(тар)-гәзит(тәр), корреспонденция; **разноси́ть по́чту** килгән хат-гәзит таратыу

**ПОЧТАЛЬО́Н** *м* и *прост.* **ПОЧТАЛЬО́НКА** *ж* хат ташыусы, почта таратыусы (йөрөтөүсе)

**ПОЧТА́МТ** *м* почтамт (*ҡала почтаһының үҙәк бүлеге*)

**ПОЧТЕ́НИЕ** *с* хөрмәт, илтифат, ихтирам; **с почте́нием** хөрмәт менән; **оказа́ть почте́ние** ихтирам күрһәтеү ♦ **моё почте́ние** *уст.* сәләм бирҙек

**ПОЧТЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** хөрмәтле, ҡәҙерле, мөхтәрәм, затлы; **почте́нный челове́к** хөрмәтле кеше, аҙамат **2.** оло, ҙур; **почте́нный во́зраст** оло йәш

**ПОЧТИ́** *нареч.* тиерлек, тиһәң дә ярай, яҙҙы, әйтеп була, -ға/-гә яҡын; **она́ почти́ зако́нчила рабо́ту** ул эшләп бөттө тиерлек; **он почти́ попра́вился** уны һауыҡты тиһәң дә ярай

**ПОЧТИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* ихтирам менән; **разгова́ривать почти́тельно** ихтирам менән һөйләшеү

**ПОЧТИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ихтирам, хөрмәт, ҡәҙер, түбәнселек; **обраща́ться с почти́тельностью** хөрмәт менән өндәшеү

**ПОЧТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** хөрмәтсел, түбәнселекле, ихтирамлы; **быть почти́тельным** хөрмәтсел булыу; **почти́тельное отноше́ние** ихтирамлы мөнәсәбәт **2.** *разг.* (*значительный*) ҙур, оло, шаҡтай ҙур; **на почти́тельном расстоя́нии** шаҡтай ҙур арала

**ПОЧТИ́ТЬ** *сов. кого-что* хөрмәтләү, ихтирам итеү, ололап иҫкә төшөрөү; **почти́ть па́мять** хөрмәтләп иҫкә алыу

**ПОЧТМЕ́ЙСТЕР** *м; уст.* почтмейстер (*почта менән идаралыҡ итеүсе*)

**ПОЧТО́ВЫЙ,** -ая, -ое почта ...ы, ям ...ы; **почто́вый я́щик** почта йәшниге; **почто́вая ло́шадь** *ист.* ям аты

**ПОЧУ́ВСТВОВАТЬ** *сов. см.* **чу́вствовать**; **почу́вствовать го́лод** асыҡҡанды һиҙеү; **почу́вствовать себя́ лу́чше** үҙеңде яҡшыраҡ тойоу

**ПОЧУ́ВСТВОВАТЬСЯ** *сов. см.* **чу́вствоваться**

**ПОЧУДИ́ТЬ** *сов.; разг.* йүләрләнеү, йүләрләнеп алыу, кеше көлдөрөп алыу

**ПОЧУ́ДИТЬСЯ** *сов. см.* **чу́диться**; **мне почу́дился телефо́нный звоно́к** миңә телефон шылтырауы ишетелгән кеүек булды

**ПОЧУ́ЯТЬ** *сов. см.* **чу́ять**; **соба́ка почу́яла зве́ря** эт йәнлек барлығын һиҙеп ҡалды

**ПОША́ЛИВАТЬ** *несов.; разг.* **1.** шаярыу, шаярғылау; **де́ти ста́ли поша́ливать** балалар шаярғылай башланы **2.** *перен.* шаярғылау,

ауыртҡылау; **у него́ се́рдце поша́ливает** уның йөрәге шаярғылай

**ПОШАЛИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* әҙерәк шаярып алыу, бер аҙ шаярыу

**ПОША́МКАТЬ** *сов. чем* и *без доп.*; *разг.* ауыҙҙы шапылдатып ҡуйыу (алыу), ауыҙҙы шапылдатыу

**ПОША́РИТЬ** *сов.*; *разг.* аҡтарыу, һәрмәү, һәрмәштереү; **поша́рить в карма́нах** кеҫәләрҙе аҡтарыу

**ПОШАТНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡыйшайтыу, эйелдереү, ҡырынайтыу; **пошатну́ть забо́р** ҡойманы ҡыйшайтыу **2.** *перен.* (*поколебать*) ҡаҡшатыу, ҡаҡшатып ҡуйыу

**ПОШАТНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*потерять равновесие*) ауып (ҡолап) китә яҙыу **2.** ҡыйшайыу, ҡырынайыу, ҡыйшайып китеү; **столб пошатну́лся** бағана ҡыйшайып китте **3.** *перен.* ҡаҡшай башлау; **здоро́вье пошатну́лось** һаулыҡ ҡаҡшаны

**ПОША́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* аушанлау, аушантаушан килеү, һелкенеп тороу; **зуб поша́тывается** теш һелкенеп тора

**ПОШВЫ́РИВАТЬ** *несов. что*, *чем*; *разг.* ырғытыштырыу, бәргеләштереү

**ПОШВЫРЯ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** ырғытып (ташлап, быраҡтырып) бөтөү; **пошвыря́ть ве́щи в чемода́н** әйберҙәрҙе сумаҙанға ырғытып бөтөү **2.** *чем* ташлау, бәргеләү, ырғытып алыу; **пошвыря́ть камня́ми** таш менән бәргеләү

**ПОШЕВЕ́ЛИВАТЬ** *несов. что*, *чем* ҡыймылдатҡылау, ҡыбырлатҡылау, ҡуҙғатып тороу; **пошеве́ливать у́гли в пе́чке** мейестәге ҡуҙҙы ҡуҙғатып тороу

**ПОШЕВЕ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* һелкенгеләү, ҡыбырлатҡылау **2.** *повел.* **пошеве́ливайся**! йәһәтерәк бул!, ҡыймылда!, ашыҡ!, ҡабалан!

**ПОШЕВЕЛИ́ТЬ** *сов. что*, *чем* ҡыймылдатыу, бер аҙ ҡуҙғатыу, ҡыбырлатып ҡуйыу; **пошевели́ть руко́й** ҡулды ҡыбырлатып ҡуйыу; **на́до люде́й пошевели́ть** кешеләрҙе бер аҙ ҡуҙғатырға кәрәк

**ПОШЕВЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* әҙерәк ҡыбырлау, бер аҙ ҡыймылдау, әҙерәк ҡуҙғалыу; **невозмо́жно пошевели́ться** ҡыймылдап та булмай

**ПОШЕВЕЛЬНУ́ТЬ** *сов. что*, *чем* ҡыбырлатыу, ҡуҙғатыу, һелкетеү

**ПОШЕВЕЛЬНУ́ТЬСЯ** *сов.* ҡыймылдау, һелкенеп ҡуйыу, ҡуҙғалыу

**ПОШЕПТА́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* бышылдау, бышылдап әйтеү

**ПОШЕПТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бышылдашыу, шыбырлашыу, шыбырлап һөйләшеү, бышылдашып алыу

**ПОШИ́Б** *м*; *разг.*, *неодобр.* (*манера*) алым, ҡылыҡ, булмыш, ҡалып; **лю́ди одного́ поши́ба** бер ҡалып кешеләре

**ПОШИ́В** *м*; *прост.*, *спец. см.* **поши́ть** 2; **фабри́чный поши́в оде́жды** кейемдең фабрикала тегелеүе

**ПОШИ́ВКА** *ж*; *прост. см.* **поши́ть** 2

**ПОШИ́ВОЧНЫЙ**, -ая, -ое *прост.*, *спец.* тегеү ...ы; **поши́вочная мастерска́я** тегеү оҫтаханаһы

**ПОШИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* тегеп алыу, бер аҙ тегеү **2.** *что*; *прост.* (*сшить*) тегеү, тектереү, тектереп алыу; **поши́ть о́бувь** аяҡ кейеме тектереп алыу

**ПО́ШЛИНА** *ж* пошлина, һалым (*берәй әш башҡарған йәки сиктән үткән өсөн аҡсалата түләү*); **госуда́рственная по́шлина** дәүләт пошлинаһы

**ПО́ШЛИННЫЙ**, -ая, -ое пошлина ...ы; **по́шлинный сбор** пошлина йыйымы

**ПО́ШЛОСТЬ** *ж* **1.** әшәкелек, рухи боҙоҡлоҡ, әҙәпһеҙлек **2.** әшәке һүҙ, бысраҡ һүҙ; **говори́ть по́шлости** әшәке һүҙҙәр һөйләү

**ПО́ШЛЫЙ**, -ая, -ое әшәке, боҙоҡ, әҙәпһеҙ; **по́шлый челове́к** әҙәпһеҙ кеше

**ПОШЛЯ́К** *м*; *разг.* әшәке кеше, оятһыҙ кеше, бысраҡ телле кеше

**ПОШЛЯ́ТИНА** *ж*; *разг.* әшәкелек, боҙоҡлоҡ

**ПОШТО́ПАТЬ** *сов. что* йүрмәү, йүрмәп (ямап) ҡуйыу

**ПОШТУ́ЧНО** *нареч.* берәмләп, даналап; **продава́ть пошту́чно** берәмләп һатыу

**ПОШТУ́ЧНЫЙ**, -ая -ое берәмләп, даналап, дана башынан түләнә торған; **поштучная прода́жа** берәмләп һатыу

**ПОШУМЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* шаулап китеү, шаулашыу, шаулашып алыу

**ПОШУТИ́ТЬ** *сов.* **1.** шаяртыу, шаяртып алыу; **она́ лю́бит пошути́ть** ул шаяртырға ярата **2.** (*сказать в шутку*) шаяртыу, мәрәкәләү, уйнап (мәрәкәләп) әйтеү; **я то́лько пошути́л** мин уйнап ҡына әйттем **3.** *над кем-чем* көләү, шаярыу, шаяртып алыу; **пошути́ть над прия́тельницей** әхирәтте шаяртып алыу

**ПОЩА́ДА** *ж* аяу, мәрхәмәт, шәфҡәт; **проси́ть поща́ды** мәрхәмәт һорау; **без поща́ды** аяуһыҙ, аяу белмәй

**ПОЩАДИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*пожалеть*) аяу, мәрхәмәт күрһәтеү, ҡыҙғаныу; **не пощади́ть солда́т** һалдаттарҙы аямау **2.** (*сохранить*) һаҡлап ҡалыу, һаҡлау; **пощади́ть своё здоро́вье** үҙеңдең сәләмәтлегеңде һаҡлап ҡалыу **3.** (*бережно отнестись*) йәлләү, ҡыҙғаныу, аяу, һаҡлау; **пощади́ть самолю́бие** күңелен һаҡлау

**ПОЩЕГОЛЯ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ҡупшыланып йөрөп алыу, кейенеп-яһанып йөрөү

**ПОЩЕКОТА́ТЬ** *сов. кого-что* ҡытыҡлау, ҡытыҡлап алыу

**ПОЩЁЛКАТЬ** *сов.* **1.** (*пальцами*) сиртеп алыу; (*кнутом*) шартлатып ебәреү; (*зубами*) шаҡылдатыу; (*языком*) шапылдатыу, шартла-

тыу; **пощёлкать языко́м** тел шартлатыу **2.** (*о птицах*) сутылдау, сут-сут итеү, сутылдап ҡуйыу

**ПОЩЁЛКИВАТЬ** *несов.* **1.** *что*, *чем* и *без доп.* шартлатҡылау, шартлатыу **2.** (*о птицах*) сутылдау, сут-сут итеү

**ПОЩЁЧИНА** *ж* **1.** (*удар по щеке*) яңаҡлау, сикәләү, сикәгә сабыу (һуғыу) **2.** *перен.* (*оскорбление*) хур итеү, мыҫҡыл итеү, мәсхәрә итеү

**ПОЩИПА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *чего* (*щипать некоторое время*) йолҡоп-йолҡоп алыу, йолкҡолау, семтекләү; **пощипа́ть траву́** үлән семтекләү **2.** (*ощипать*) өҙөп ашау, йолҡоу; **пощипа́ть гуся́** ҡаҙ йолҡоу **3.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* семтеп-семтеп алыу, семеткеләп алыу

**ПОЩИ́ПЫВАТЬ** *несов. что* **1.** семтекләү, семеткеләү, унан-бынан семтеү **2.** *безл.* (*жечь, разъедать, саднить*) әсетеү, әсеттереү; **от ды́ма пощи́пывало в глаза́х** төтөнгә күҙ әсетә

**ПОЩУ́ПАТЬ** *сов. кого-что* тотоп ҡарау, һәрмәп ҡарау, ҡапшап ҡарау; **пощу́пать пульс** тамыр тибешен тотоп ҡарау

**ПОЩУ́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **щу́пать**

**ПОЭ́ЗИЯ** *ж* **1.** (*один из основных жанров литературы*) шиғриәт, поэзия; **башки́рская поэ́зия** башҡорт шиғриәте; **ве́чер поэ́зии** шиғриәт кисәһе **2.** (*стихи*) шиғыр, шиғри әҫәрҙәр **3.** *чего*, *какая*; *перен.* нәфислек, гүзәллек, матурлыҡ; **поэ́зия труда́** хеҙмәт гүзәллеге

**ПОЭ́МА** *ж*; *лит.* поэма (**1.** *әҙәбиәттең лиро-эпик төрөнә ингән жанрҙарҙың береһе* **2.** *муз. программа характерындағы ирекле әҫәр*)

**ПОЭ́Т** *м* шағир; **поэтесса** *ж* шағирә; **молодо́й поэ́т** йәш шағир; **наро́дный поэ́т** халыҡ шағиры

**ПОЭТИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* шиғрилаштырыу (*матурлап биҙәп күрһәтеү*); **поэтизи́ровать жизнь** тормошто шиғрилаштырыу

**ПОЭ́ТИКА** *ж*; *лит.* шиғриәт, поэтика (**1.** *нәфис әҙәбиәт тураһындағы фән*, *әҙәбиәт теорияһы*, *әҙәбиәт ғилеменең бер бүлеге* **2.** *яҙыусының*, *әҙәби йүнәлештең төп стиль үҙенсәлектәре*); **поэ́тика произведе́ний Ш.Ба́бича** Ш.Бабич әҫәрҙәренең поэтикаһы

**ПОЭТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** шиғри, поэтик, шиғриәтле; **поэти́ческая нату́ра** шиғри күңелле кеше; **поэти́ческое произведе́ние** поэтик әҫәр **2.** (*связанный с творением поэзии*) ижади; **поэти́ческое вдохнове́ние** ижади илһам **3.** (*возвышенный, полный лиризма*) шиғри, гүзәл, һылыу

**ПОЭТИ́ЧНОСТЬ** *ж* шиғрилыҡ, нәфислек, гүзәллек; **при́знаки поэти́чности** шиғрилыҡ билдәләре

**ПОЭТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое шиғрилыҡ ...ы, шиғри, нәфис

**ПОЭ́ТОМУ** *нареч.* шунлыҡтан, шуның өсөн, шуға күрә

**ПОЯВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*явиться*) килеп сығыу, күренеү, күренеп ҡалыу; **появи́лась луна́** ай күренде **2.** (*возникнуть*) барлыҡҡа килеү, килеп сығыу, тыуыу; **появи́лись но́вые тру́дности** яңы ҡыйынлыҡтар килеп сыҡты ♦ **появи́ться на свет** *см.* **свет** II

**ПОЯВЛЕ́НИЕ** *с см.* **появи́ться** — **появля́ться**

**ПОЯВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **появи́ться**

**ПОЯ́РКОВЫЙ,** -ая, -ое бәрәс йөнөнән эшләнгән (баҫылған); **поя́рковые ва́ленки** бәрәс йөнөнән баҫылған быйма

**ПОЯ́РОК** *м* бәрәс йөнө

**ПО́ЯС** *м* **1.** (*ремень, кушак*) билғау, билбау, ҡушаҡ, бута; **ко́жаный по́яс** ҡайыш билбау **2.** *анат.* билбау; **та́зовый по́яс** янбаш билбауы (*янбаш һәм һигеҙгүҙ һөйәктәре*) **3.** (*талия, поясница*) бил; **брать друг дру́га за по́яс** билдән алышыу **4.** *геогр.* бүлкәт, пояс; **уме́ренный по́яс** уртаса бүлкәт **5.** *эк.* бүлкәт, пояс; **тари́фный по́яс** тариф бүлкәте ♦ **заткну́ть за по́яс** танауына сиртеү, өҫтөн сығыу; **спаса́тельный по́яс** ҡотҡарғыс пояс (*һыуҙа батмаҫ өсөн кейелә*)

**ПОЯСНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **поясни́ть** — **поясня́ть** **2.** (*объяснение*) аңлатма; **нау́чное поясне́ние** фәнни аңлатма; **дать поясне́ние** аңлатма биреү

**ПОЯСНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аңлатмалы, аңлатма ...ы, асыҡлаусы ...ы, аныҡлаусы ...ы; **поясни́тельные слова́** аныҡлаусы һүҙҙәр; **поясни́тельный текст** аңлатмалы текст

**ПОЯСНИ́ТЬ** *сов. что* аңлатыу, төшөндөрөү, аңлатып биреү

**ПОЯСНИ́ЦА** *ж* бил; **боль в поясни́це** бил ауыртыу

**ПОЯСНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое бил ...ы, билдәге; **поясни́чные мы́шцы** бил мускулдары

**ПОЯСНО́Й,** -ая, -ое **1.** бил ...ы, билбау ...ы; **поясно́й реме́нь** бил ҡайышы **2.** (*до пояса*) билдән, билдән алып, билгә тиклем, бил тиңенән; **поясно́й портре́т** бил тиңенән төшкән һүрәт **3.** *геогр.*, *эк.* (*исчисляемый, производимый по поясам*) бүлкәт ...ы, пояс ...ы; **поясны́е це́ны** бүлкәт хаҡтары; **поясно́й тари́ф** бүлкәт тарифы ♦ **поясно́е вре́мя** *астр.* бүлкәт ваҡыты

**ПОЯСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **поясни́ть**

**ПОЯСНЯ́ТЬСЯ** *страд. от* **поясня́ть**

**ПРА...** *приставка*; "*иң боронғо*", "*башланғыс*", "*тәү*" *мәғәнәләрендә исем һәм сифаттар яһағанда ҡулланыла*, *мәҫ.*, **праро́дина** иң боронғо ил

**ПРАБА́БКА** *ж см.* **праба́бушка**

**ПРАБА́БУШКА** *ж* ҡарт өләсәй, ҙур (оло) инәй (*олатаһының йәки өләсәһенең әсәһе*)

**ПРА́ВДА** *ж* **1.** (*истина, правдивость*) дөрөҫлөк, дөрөҫ, ысын, хәҡиҡәт, хаҡлыҡ, ғәҙеллек; **найти́ пра́вду** дөрөҫлөктө табыу; **говори́ть пра́вду** дөрөҫөн (ысынын) әйтеү; **приня́ть за пра́вду** ысынға алыу **2.** *в знач. нареч.* и *сказ.* дөрөҫ, хаҡ, раҫ, ысын **3.** *в знач. вводн. сл.* (*действительно*) дөрөҫөндә, ысынында, ысынлап та; **она́, пра́вда, согласи́лась** ул, ысынлап та,

риза булғайны ♦ **пра́вда глаза́ ко́лет** тураһын әйткән туғанына ярамаған; **все́ми пра́вдами и непра́вдами** алдап-йолдап, һәр төрлө юл менән; **по пра́вде говоря́** *в знач. вводн. сл.* дөрөҫөн әйткәндә; **пра́вду-ма́тку ре́зать** күҙгә ҡарап тура әйтеү; **смотре́ть пра́вде в глаза́** дөрөҫлөктән ҡасмау, дөрөҫлөктән ҡурҡмау

**ПРАВДИ́ВО** *нареч.* хаҡ, дөрөҫ; **правди́во опи́сывать собы́тия** ваҡиғаларҙы дөрөҫ яҙыу

**ПРАВДИ́ВОСТЬ** *ж* дөрөҫлөк, ғәҙеллек, ысынлыҡ; **правди́вость твои́х слов** һинең һүҙҙәреңдең дөрөҫлөгө

**ПРАВДИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*содержащий правду*) дөрөҫ, тоғролоҡло, хаҡ, раҫ; **правди́вое сло́во** дөрөҫ һүҙ, хаҡ һүҙ; **быть правди́вым** тоғролоҡло булыу **2.** (*стремящийся к правде*) тура, хыянатһыҙ, ғәҙел; **правди́вый челове́к** ғәҙел кеше

**ПРАВДОПОДО́БИЕ** *с* дөрөҫлөк ишараты, ысынға оҡшаш, дөрөҫкә яҡын

**ПРАВДОПОДО́БНЫЙ,** -ая, -ое дөрөҫкә оҡшаған, ышанырлыҡ, кеше ышанырлыҡ; **правдоподо́бный расска́з** дөрөҫкә оҡшаған хикәйә

**ПРА́ВЕДНИК** *м* и **ПРА́ВЕДНИЦА** *ж* **1.** диндар (тәҡүә) кеше **2.** *перен., обычно ирон.* хыянатһыҙ, үтә тоғролоҡло кеше

**ПРА́ВЕДНЫЙ,** -ая, -ое *высок.* хаҡ, хыянатһыҙ, ғәҙел

**ПРАВЕ́ТЬ** *несов.*; *полит.* уңға китеү, уңға боролоу (*сәйәсәттә реакцион йүнәлеш алыу*)

**ПРА́ВИЛО** *с* **1.** *в разн. знач.* ҡағиҙә, тәртип; **пра́вила вну́треннего распоря́дка** эске тәртип ҡағиҙәләре; **пра́вила доро́жного движе́ния** юл йөрөү ҡағиҙәләре; **пра́вило бура́вчика** *физ.* бырау ҡағиҙәһе; **пра́вила сложе́ния** *мат.* ҡушыу ҡағиҙәләре; **пра́вила игры́** уйын тәртибе; **знать пра́вила хоро́шего то́на** әҙәп ҡағиҙәләрен белеү **2.** (*норма поведения*) ҡағиҙә, ғәҙәт, ҡылыҡ, заң; **челове́к стро́гих пра́вил** ҡаты тәртипкә өйрәнгән кеше ♦ **как пра́вило** ҡағиҙә буларак; **по всем пра́вилам** урынына (еренә) еткереп

**ПРАВИ́ЛО** *с* **1.** *тех.* тигеҙләгес (*тигеҙләү йәки тигеҙлекте билдәләү ҡулайламаһы*) **2.** (*весло или жердь для управления чем-л.*) кәмә ҡойроғо, һал ҡойроғо, ҡолға

**ПРА́ВИЛЬНО 1.** *нареч.* дөрөҫ; **пра́вильно чита́ть** дөрөҫ уҡыу; **поступи́ть пра́вильно** дөрөҫ эш итеү **2.** *в знач. сказ.*; *разг.* (*как утверждение*) дөрөҫ, раҫ, хаҡ, ысын

**ПРА́ВИЛЬНОСТЬ** *ж* дөрөҫлөк, дөрөҫ булыу; **пра́вильность реше́ния** ҡарарҙың дөрөҫлөгө

**ПРА́ВИЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* дөрөҫ, тура, ысын, тәртипле, хаҡ, тәртип буйынса; **пра́вильный перево́д** дөрөҫ тәржемә; **пра́вильное сообще́ние** дөрөҫ хәбәр; **пра́вильный отве́т** дөрөҫ яуап; **пра́вильное пита́ние** тәртип буйынса туҡланыу ♦ **пра́вильная пирами́да** *мат.* төҙөк пирамида; **пра́вильная дробь** *мат.* дөрөҫ кәсер

**ПРАВИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** хаким, хөкүмәт башлығы, хөкөмдар **2.** *уст.* (*управляющий*) идара итеүсе

**ПРАВИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* хакимә, хөкүмәт башындағы ҡатын-ҡыҙ, хөкөмдар

**ПРАВИ́ТЕЛЬСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое хөкүмәт ...ы, хөкүмәт тарафынан сығарылған; **прави́тельственное заявле́ние** хөкүмәт белдереүе

**ПРАВИ́ТЕЛЬСТВО** *с* хөкүмәт; **чле́ны прави́тельства** хөкүмәт ағзалары

**ПРА́ВИТЬ I** *несов. кем-чем* и *без доп.* **1.** (*руководить*) идара итеү, етәкселек итеү; **пра́вить госуда́рством** дәүләт менән идара итеү **2.** (*направлять ход движения кого-чего-л.*) тотоу, тотоп барыу, йөрөтөү; **пра́вить маши́ной** машина йөрөтөү

**ПРА́ВИТЬ II** *несов. что* **1.** (*исправлять*) төҙәтеү, дөрөҫләү; **пра́вить ру́копись** ҡулъяҙманы төҙәтеү **2.** *спец.* (*выпрямлять, выравнивать*) төҙәйтеү, тигеҙләү; **пра́вить жесть** ҡалай төҙәйтеү **3.** (*точить*) яныу, үткерләү, беләүләү; **пра́вить косу́** салғы яныу

**ПРА́ВКА** *ж см.* **пра́вить** II; **пра́вка те́кста** текст төҙәтеү

**ПРАВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **пра́вить** I 1; **фо́рма правле́ния** идара итеү рәүеше **2.** (*выборный орган, стоящий во главе учреждения, организации*) идара; **правле́ние колхо́за** колхоз идараһы; **заседа́ние правле́ния** идара ултырышы ♦ **бразды́ правле́ния** баш булыу, идара итеү

**ПРА́ВНУК** *м* бүлә (*ейән йәки ейәнсәрҙең улы*); **пра́внучка** *ж* бүләсәр (*ейән йәки ейәнсәрҙең ҡыҙы*)

**ПРА́ВО I** *с* **1.** хоҡуҡ; **избира́тельное пра́во** һайлау хоҡуғы; **пра́во со́бственности** милеккә хоҡуҡ; **пра́во на труд** хеҙмәткә хоҡуҡ **2.** (*наука, учебная дисциплина*) хоҡуҡ фәне; **уголо́вное пра́во** енәйәт эштәре тураһында хоҡуҡ фәне **3.** (*возможность действовать каким-л. образом*) хаҡ, хаҡлыҡ; **име́ет пра́во** хаҡы бар **4.** (*основание, причина*) хаҡ, нигеҙ, сәбәп; **по како́му пра́ву ты вме́шиваешься?** ни хаҡың бар ҡыҫылырға? **5.** *мн.* **права́** (*документ на управление автомобилем и т.п.*) права (*автомобиль, мотоцикл һ.б. йөрөтөүгә*); **води́тельские права́** водитель праваһы

**ПРА́ВО II** *вводн. сл.*; *разг.* (*в самом деле*) ысынлап та, дөрөҫөн әйткәндә, ысын; **я, пра́во, не зна́ю** дөрөҫөн әйткәндә, мин белмәйем

**ПРАВОБЕРЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое уң яҡ ярҙағы, уң ярҙағы, уң яр буйы

**ПРАВОВЕ́Д** *м* хоҡуҡ белгесе

**ПРАВОВЕ́ДЕНИЕ** *с* хоҡуҡ фәне, хоҡуҡ белеме

**ПРАВОВЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** динсел, дингә ныҡ ышаныусы **2.** (*мусульманский*) мосолман, хаҡ динле

**ПРАВОВО́Й,** -ая, -ое хоҡуҡи, хоҡуҡ ...ы, юридик, закон буйынса; **правово́е госуда́рство**

хоҡуҡи дәүләт; **правово́й ста́тус** хоҡуҡи хәл; **правово́й акт** юридик акт; **правова́я охра́на** закон буйынса һаҡлау

**ПРАВОМЕ́РНОСТЬ** *ж* хаҡлыҡ, законлылыҡ, нигеҙлелек

**ПРАВОМЕ́РНЫЙ,** -ая -ое нигеҙле, урынлы, хаҡлы; **правоме́рный вы́вод** хаҡлы һығымта

**ПРАВОМО́ЧИЕ** *с* и **ПРАВОМО́ЧНОСТЬ** *ж*; *юр.* хоҡуҡлылыҡ, тулы хоҡуҡлы булыу, хоҡуғы булыу

**ПРАВОМО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *юр.* хоҡуҡлы, тулы хоҡуҡлы; **правомо́чное лицо́** тулы хоҡуҡлы шәхес

**ПРАВОНАРУШЕ́НИЕ** *с*; *юр.* закон (хоҡуҡ) (тәртип) боҙоу, тәртип боҙоу; **администрати́вное правонаруше́ние** административ тәртип боҙоу

**ПРАВОНАРУШИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПРАВОНАРУШИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж*; *юр.* тәртип (хоҡуҡ) боҙоусы, енәйәтсе

**ПРАВООТНОШЕ́НИЕ** *с*; *юр.* хоҡуҡ мөнәсәбәте

**ПРАВООХРАНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое хоҡуҡ тәртибен һаҡлау, законлылыҡты һаҡлау; **правоохрани́тельная де́ятельность** хоҡуҡ тәртибен һаҡлау эшмәкәрлеге

**ПРАВОПИСА́НИЕ** *с* дөрөҫ яҙыу, орфография; **пра́вила правописа́ния** дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре

**ПРАВОПОРЯ́ДОК** *м*; *юр.* хоҡуҡ тәртибе, закон тәртибе

**ПРАВОПРЕЕ́МНИК** *м*; *юр.* хоҡуҡ вариҫы (*кеше йәки ойошма*)

**ПРАВОПРЕЕ́МСТВО** *с*; *юр.* хоҡуҡтарҙың мираҫ булып күсеүе, хоҡуҡтарҙың мираҫлылығы

**ПРАВОСЛА́ВИЕ** *с* православие (*христиан диненең төп бер төрө*)

**ПРАВОСЛА́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** православие ...ы, православие динендәге; **правосла́вная це́рковь** православие сиркәүе **2.** *в знач. сущ.* **правосла́вный** *м* и **правосла́вная** *ж* православие динендәге кеше

**ПРАВОСОЗНА́НИЕ** *с*; *юр.* хоҡуҡи аң, хоҡуҡтарҙы аңлау

**ПРАВОСПОСО́БНОСТЬ** *ж*; *юр.* хоҡуҡи һәләтлелек, хоҡуҡҡа эйә булыу, хоҡуҡлы булыу

**ПРАВОСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое *юр.* хоҡуҡлы, хоҡуҡҡа эйә, хоҡуғы булған

**ПРАВОСТОРО́ННИЙ,** -яя, -ее уң яҡ, уң яҡтағы

**ПРАВОСУ́ДИЕ** *с* **1.** (*судебная деятельность государства*) хөкөм эше, суд, суд эшмәкәрлеге, суд органдарының эше **2.** (*справедливое решение*) ғәҙел хөкөм, хаҡ хөкөм; **тре́бовать правосу́дия** ғәҙел хөкөм талап итеү

**ПРАВОТА́** *ж* хаҡлыҡ, дөрөҫлөк, ғәҙеллек; **ве́рить в правоту́ своего́ де́ла** үҙ эшеңдең хаҡлығына ышаныу; **чу́вствовать свою́ правоту́** үҙеңдең хаҡлығыңды тойоу

**ПРАВОФЛАНГО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** уң яҡтағы, уң флангылағы **2.** *в знач. сущ.* **правофланго́вый** *м*: 1) уң флангылағы кеше, уң флангыла тороусы; 2) *перен.* (*служащий примером*) үрнәк, өлгө булып тороусы, алдынғы, еңеүсе

**ПРА́ВЫЙ I,** -ая, -ое **1.** уң, уң яҡ; **пра́вая рука́** уң ҡул **2.** *полит.* уң (*реакцион, консерватив*); **пра́вая па́ртия** уң фирҡә **3.** *в знач. сущ.* **пра́вые** *мн.*; *полит.* уң, уңсылар, уңдар ♦ **пра́вая рука́** *чья кемдеңдер* уң ҡанаты

**ПРА́ВЫЙ II,** -ая, -ое **1.** (*невиновный*) ғәйепһеҙ, гөнаһһыҙ; **защища́ть пра́вого** ғәйепһеҙ кешене яҡлау **2.** (*справедливый*) ғәҙел, хаҡ, дөрөҫ; **пра́вое де́ло** ғәҙел эш **3.** (*правильно говорящий, поступающий и т.п.*) хаҡлы, дөрөҫ; **быть пра́вым** хаҡлы булыу

**ПРА́ВЯЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **пра́вить** I; **2.** *прил.* етәксе, хакимлыҡ (етәкселек) итеүсе, хаким; **пра́вящие круги́** етәксе даирәләр; **пра́вящий класс** хаким синыф

**ПРАГМАТИ́ЗМ** *м*; *в разн. знач.* прагматизм

**ПРА́ДЕД** *м* **1.** ҡарт олатай (*олатайҙың йәки өләсәйҙең атаһы*) **2.** *мн.* **пра́деды** (*предки*) ата-бабалар

**ПРАДЕ́ДУШКА** *м см.* **пра́дед** 1

**ПРА́ЗДНЕСТВО** *с* байрам, тантана, тантаналы байрам

**ПРА́ЗДНИК** *м*; *в разн. знач.* байрам; **национа́льный пра́здник** милли байрам; **пра́здник Побе́ды** Еңеү байрамы ♦ **бу́дет и на на́шей у́лице пра́здник** беҙгә лә байрам килер әле, беҙҙең урамда ла байрам булыр әле

**ПРА́ЗДНИЧНОСТЬ** *ж* тантаналыҡ, байрамсалыҡ

**ПРА́ЗДНИЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** байрам ...ы; **пра́здничные дни** байрам көндәре; **пра́здничный наря́д** байрам кейеме **2.** (*нарядный*) байрам ...ы, байрамса булған, байрамға хас; **пра́здничный вид** байрамса төҫ **3.** *перен.* (*торжественно-радостный*) тантаналы, шатлыҡлы; **пра́здничное настрое́ние** тантаналы кәйеф

**ПРА́ЗДНОВАНИЕ** *с см.* **пра́здновать**; **пра́зднование Пе́рвого ма́я** Беренсе майҙы байрам итеү

**ПРА́ЗДНОВАТЬ** *несов. что* и *без. доп.* байрам итеү

**ПРА́ЗДНОВАТЬСЯ** *несов.* (*отмечаться*) байрам ителеү

**ПРАЗДНОСЛО́ВИЕ** *с*; *книжн.* буш һүҙ, буш һүҙ һөйләү

**ПРА́ЗДНОСТЬ** *ж* **1.** эшләмәй (эшһеҙ) йәшәү, ғәмһеҙ йәшәү **2.** *перен.* (*бессодержательность, пустота*) мәғәнәһеҙлек, маҡсатһыҙ йәшәү

**ПРА́ЗДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*ничем не занятый, свободный*) эшһеҙ, тиккә үткән; **пра́здная жизнь** тиккә үткән ғүмер **2.** *перен.* (*пустой, бесцельный*) буш, мәғәнәһеҙ; **пра́здный вопро́с** мәғәнәһеҙ һорау

**ПРА́КТИК** *м* практик (*тәжрибәле кеше*)

**ПРА́КТИКА** *ж* **1.** *филос.* практика; **сочета́ть тео́рию с пра́ктикой** теорияны практика менән бәйләү **2.** (*жизнь, действительность*) тормош, ғәмәл; **применя́ть на пра́ктике** тормошта ҡулланыу; **на пра́ктике совсе́м не так** ғәмәлдә бөтөнләй улай түгел **3.** (*опыт*) күнекмә, тәжрибә; **пра́ктика рабо́ты** эш тәжрибәһе **4.** практика; **уе́хать на пра́ктику** практикаға китеү **5.** *уст.* (*деятельность врача или юриста*) эш, кәсеп, шөғөл; **враче́бная пра́ктика** табиплыҡ шөғөлө

**ПРАКТИКА́НТ** *м* и **ПРАКТИКА́НТКА** *ж* практика үтеүсе, өйрәнсек, практикант

**ПРАКТИКОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* (*применять на деле*) ҡулланыу; **практикова́ть но́вый спо́соб** яңы ысулды ҡулланыу **2.** *без доп.*; *уст.* (*о враче или юристе*) эшләү (*үҙ эшен алып барыу*); **э́тот вра́ч практику́ет де́сять лет** был табип ун йыл эшләй

**ПРАКТИКОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*применяться на деле*) ҡулланылыу **2.** (*упражняться*) күнегеү, тәжрибә алыу, өйрәнеү; **практикова́ться в языка́х** сит телдәр өйрәнеү

**ПРА́КТИКУМ** *м* практикум (*берәй уҡыу предметы буйынса практик дәрестәр төрө*); **пра́ктикум по ру́сскому языку́** рус теленән практикум

**ПРАКТИЦИ́ЗМ** *м*; *книжн.* **1.** (*практический подход к чему-л.*) практицизм, эшлеклелек **2.** (*предпочтение, отдаваемое практике, недооценка теории*) практицизм (*практик эшкә генә бирелеү*)

**ПРАКТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** практик; **практи́ческие заня́тия** практик дәрестәр **2.** *см.* **практи́чный** 1; **практи́ческий челове́к** эшлекле кеше

**ПРАКТИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** тәжрибәлелек, эшлеклелек **2.** ҡулайлылыҡ, уңайлылыҡ, йәтешлек; **практи́чность о́буви** аяҡ кейеменең уңайлылығы

**ПРАКТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*деловитый*) тәжрибәле, булдыҡлы, эшлекле; **практи́чный челове́к** тәжрибәле кеше **2.** (*выгодный, удобный*) ҡулайлы, уңайлы, йәтеш; **практи́чная вещь** уңайлы нәмә

**ПРАМА́ТЕРЬ** *ж*; *уст.* тәү инә, тәү әсә (*ырыуҙы башлап ебәреүсе әсә*)

**ПРАОТЕ́Ц** *м*; *уст.* тәү ата, тәү баба, (төп) ата-баба (*ырыу, нәҫел башы*) ♦ **отпра́виться к праотца́м** *шутл.* ата-бабалар янына китеү (*үлеү*)

**ПРА́ПОРЩИК** *м* прапорщик (**1.** *революцияға тиклем Рәсәй армияһында тәүге офицерлыҡ чины һәм шул чиндағы кеше* **2.** *хәҙерге армияла хәрби звание һәм шул званиелағы кеше*)

**ПРАПРА́ВНУК** *м* тыуа (*бүлә йәки бүләсәрҙең улы*); **прапра́внучка** *ж* тыуасар (*бүлә йәки бүләсәрҙең ҡыҙы*)

**ПРАПРА́ДЕД** *м* ҡарт олатайҙың (ҡарт өләсәйҙең) атаһы

**ПРАРО́ДИНА** *ж* төп ил, беренсе торған ер, тыуған ер, ата-бабалар ере

**ПРАРОДИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** *уст.* (*родоначальник*) боронғо ата, ырыу (нәҫел, тоҡом) башлығы (башы) **2.** *мн.* **прароди́тели** ата-баба(лар)

**ПРАХ** *м* **1.** *трад.-поэт.* (*пыль*) саң, туҙан, көл; **разве́ять в прах** көлөн күккә осороу **2.** *высок.* (*останки*) мәйет, кәүҙә, үлек; **здесь поко́ится прах поэ́та** бында шағирҙың кәүҙәһе ята ♦ **пойти́ пра́хом** елгә осоу, көл булыу; **в пух (и прах)** *см.* **пух**

**ПРА́ЧЕЧНАЯ** *ж* кер йыуыу йорто

**ПРА́ЧКА** *ж* кер йыуыусы (*ҡатын-ҡыҙ*)

**ПРАЩА́** *ж* и **ПРАЩ** *м* һиртмәк, һапҡын (*боронғо таш атыу ҡоралы*)

**ПРА́ЩУР** *м* боронғо ата, нәҫел (ырыу, тоҡом) башлығы (башы)

**ПРАЯЗЫ́К** *м*; *лингв.* тәү тел (*теоретик рәүештә кеҙ алдына килтерелгән боронғо тел*)

**ПРЕ...** *приставка* **1.** *ҡылым яһағанда ҡулланылып, түбәндәгеләрҙе аңлата*: 1) *бер сифаттан икенсе сифатҡа әүерелеүҙе, үҙгәреүҙе, мәҫ.*, **преобразова́ть** үҙгәртеп ҡороу; 2) *эш-хәлдең үтә көслө булыуын, мәҫ.*, **превозноси́ть** үтә маҡтау, күккә күтәреү; 3) *"пере..." приставкаһының мәғәнәһен, мәҫ.*, **преступи́ть** аша сығыу, боҙоу **2.** *сифат һәм рәүештәр яһағанда ҡулланылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен белдерә, мәҫ.*, **пренеприя́тный** үтә күңелһеҙ; **преспоко́йно** үтә тыныс, тып-тыныс ҡына; **преми́лый** бигерәк һөйкөмлө

**ПРЕА́МБУЛА** *ж* преамбула (*халыҡ-ара килешеүҙең, закондың йәки башҡа хоҡуҡи акттың инеш өлөшө*)

**ПРЕБЫВА́НИЕ** *с см.* **пребыва́ть**; **ме́сто постоя́нного пребыва́ния** даими торған урын

**ПРЕБЫВА́ТЬ** *несов.* тороу, булыу; **пребыва́ть в неве́дении** белмәй тороу

**ПРЕВАЛИ́РОВАТЬ** *несов. над кем-чем* и *без доп.*; *книжн.* артыҡ булыу, өҫтөн булыу, өҫтөнлөк итеү

**ПРЕВЕНТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* (*предупреждающий*) булдырмаҫ өсөн эшләнгән, һаҡлау өсөн яһалған, һаҡлыҡ ...ы; **превенти́вные ме́ры** һаҡлыҡ саралары

**ПРЕВЗОЙТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* өҫтөн сығыу, уҙып китеү, уҙҙырыу; **превзойти́ всех ло́вкостью** йылғырлыҡ яғынан бөтәһенән өҫтөн сығыу **2.** *что* (*превысить*) арттырыу, арттырып ебәреү ♦ **превзойти́ самого́ себя́** эшләй алмаҫ эште эшләп ҡуйыу, үҙең аптырарлыҡ эш эшләү

**ПРЕВОЗМОГА́ТЬ** *несов. см.* **превозмо́чь**

**ПРЕВОЗМО́ЧЬ** *сов. кого-что* еңеү, түҙеү, бирешмәү; **превозмо́чь сон** йоҡоно еңеү ♦ **превозмо́чь себя́** үҙеңде еңеү

**ПРЕВОЗНЕСТИ́** *сов. кого-что* ҙурлау, күтәреү, кәрәгенән артыҡ маҡтау ♦ **превознести́ до небе́с** *см.* **не́бо**

**ПРЕВОЗНЕСТИ́СЬ** *сов.*; *уст.* ҙурланыу, күтәрелеү, кәрәгенән артыҡ маҡталыу

**ПРЕВОЗНОСИ́ТЬ** *несов. см.* **превознести́**

**ПРЕВОЗНОСИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **превознести́сь 2.** *страд. от* **превозноси́ть**

**ПРЕВОЗНОШЕ́НИЕ** *с см.* **превозноси́ть**

**ПРЕВОСХОДИ́ТЕЛЬСТВО** *с*; *уст.* ғали йәнәп, хәҙрәт; **ва́ше превосходи́тельство** ғали йәнәптәре (*ҙур дәрәжәле кешеләргә мөрәжәғәт һүҙе*)

**ПРЕВОСХОДИ́ТЬ** *несов. см.* **превзойти́**

**ПРЕВОСХО́ДНО** *нареч.* бик яҡшы, ғәжәп, бик шәп; **она́ превосхо́дно игра́ет на роя́ле** ул роялдә бик яҡшы уйнай

**ПРЕВОСХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое бик яҡшы (һәйбәт, шәп); **превосхо́дная пого́да** бик яҡшы көн ♦ **превосхо́дная сте́пень** *грам.* артыҡлыҡ дәрәжәһе (*сифатта, рәүештә*)

**ПРЕВОСХО́ДСТВО** *с* өҫтөнлөк, артыҡлыҡ, өҫтөнлөк итеү; **демонстри́ровать превосхо́дство** өҫтөнлөк күрһәтеү; **име́ть превосхо́дство в те́хнике** техникала өҫтөнлөк итеү

**ПРЕВОСХОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее *прич.* и *прил.* өҫтөнлөклө, өҫтөн; **счита́ть превосходя́щим** өҫтөн һанау

**ПРЕВРАТИ́ТЬ** *сов. кого-что, в кого-что* әүерелдереү, әйләндереү, һабыштырыу, бороу; **преврати́ть во́ду в пар** һыуҙы боҫҡа әйләндереү; **преврати́ть в лентя́я** ялҡауға әйләндереү; **преврати́ть в шу́тку** уйынға һабыштырыу

**ПРЕВРАТИ́ТЬСЯ** *сов. в кого-что* әүерелеү, әйләнеү; **вода́ преврати́лась в лёд** һыу боҙға әйләнде ♦ **преврати́ться в слух** ҡолаҡ торғоҙоп тыңлау, йотлоғоп тыңлау

**ПРЕВРА́ТНОСТЬ** *ж* **1.** (*изменчивость*) үҙгәреүсәнлек, үҙгәрешлелек; яңылыш булыу **2.** *обычно мн.* **превра́тности**; *уст.* (*дурной поворот событий*) көтөлмәгән үҙгәреш, кирелек, ғәләмәт; **превра́тности судьбы́** яҙмыш кирелектәре

**ПРЕВРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* (*переменчивый*) үҙгәреүсән, үҙгәрешле **2.** (*ложный, искажённый*) үҙгәртелгән, боҙолған, яңылыш; **превра́тное поня́тие** яңылыш фекер

**ПРЕВРАЩА́ТЬ** *несов. см.* **преврати́ть**

**ПРЕВРАЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **преврати́ться 2.** *страд. от* **превраща́ть**

**ПРЕВРАЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **преврати́ть** — **превраща́ть**, **преврати́ться** — **превраща́ться**; **превраще́ние элеме́нтов** *хим.* элементтарҙың әүерелеүе; **непо́лное превраще́ние** *физ.* тулы булмаған әүерелеү **2.** (*резкое изменение*) ҡапыл (көтөлмәгән) үҙгәреш, үҙгәреп китеү, әүерелеү

**ПРЕВЫ́СИТЬ** *сов. что* **1.** арттырыу, аштырыу, аштырып ебәреү; **превы́сить план** планды арттырыу **2.** (*выйти за пределы допустимого*) аштырыу, арттырып ебәреү; **превы́сить ме́ру** самаdebtан аштырыу

**ПРЕВЫША́ТЬ** *несов. см.* **превы́сить**

**ПРЕВЫША́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **превыша́ть**

**ПРЕВЫ́ШЕ** *нареч.*; *высок.* юғарыраҡ, бик юғары ♦ **превы́ше всего́** барынан да юғары, бөтәһенән дә өҫтөн (тороу)

**ПРЕВЫШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **превы́сить** — **превыша́ть**; **превыше́ние вла́сти** властан артыҡ файҙаланыу **2.** (*излишек*) артыҡ; **вы́полнить план с превыше́нием** планды артығы менән үтәү

**ПРЕГРА́ДА** *ж* **1.** кәртә, ҡойма **2.** *перен.* кәртә, ҡамасау, тотҡарлыҡ, ҡаршылыҡ; **иску́сственные прегра́ды** яһалма тотҡарлыҡтар

**ПРЕГРАДИ́ТЬ** *сов. что* кәртәләү, кәртә ҡуйыу, арҡыры төшөү; **прегради́ть доро́гу** юлды кәртәләү; **прегради́ть путь** (юлға) арҡыры төшөү

**ПРЕГРАЖДА́ТЬ** *несов. см.* **прегради́ть**

**ПРЕГРАЖДЕ́НИЕ** *с см.* **прегради́ть** — **прегражда́ть**

**ПРЕГРАЖДА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **прегражда́ть**

**ПРЕД** и **ПРЕДО** *предлог*; *книжн. см.* **пе́ред**

**ПРЕД...**, **ПРЕДО...**, **ПРЕДЪ...** *приставка* **1.** *ҡылымдар, сифаттар яһағанда ҡулланылып, эштең алдан эшләнеү мәғәнәһен аңлата, мәҫ.*, **предви́деть** алдан күреү **2.** *исемдәр һәм сифаттар яһағанда ҡулланылып, "алды", "яны" һүҙҙәре менән тәржемә ителә, мәҫ.*, **предба́нник** мунса алды; **предпра́здничный** байрам алды

**ПРЕДАВА́ТЬ** *несов. см.* **преда́ть**

**ПРЕДАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **преда́ться 2.** *страд. от* **предава́ть**

**ПРЕДА́НИЕ I** *с см.* **преда́ть** 3; **преда́ние суду́** судҡа биреү, хөкөм ителеү

**ПРЕДА́НИЕ II** и **ПРЕДА́НЬЕ** *с* риүәйәт; **наро́дное преда́ние** халыҡ риүәйәте

**ПРЕ́ДАННОСТЬ** *ж* (ысын күңелдән, йән-тән менән) бирелгәнлек, тоғролоҡ; **пре́данность Ро́дине** Ватанға тоғролоҡ

**ПРЕ́ДАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **преда́ть 2.** *прил.* (*верный*) ысын күңелдән бирелгән, тоғро, фиҙаҡәр; **пре́данный друг** тоғро дуҫ

**ПРЕДА́ТЕЛЬ** *м* и **ПРЕДА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* һатлыҡ йән, хыянатсы, хаин

**ПРЕДА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое **1.** хыянатсыл, хыянат итеүсән, вәғәҙәһен боҙған, хаиндарса; **преда́тельский посту́пок** хыянатсыл ҡылыҡ **2.** *перен.* (*коварный, обманчивый*) мәкерле, хәйләле, алдатҡыс, ышаныcһыҙ; **преда́тельское ме́сто** алдатҡыс урын

**ПРЕДА́ТЕЛЬСТВО** *с* хыянат, хаинлыҡ, һатылыу; **соверши́ть преда́тельство** хаинлыҡ ҡылыу, хыянат(лыҡ) итеү; **преда́тельство дру́жбы** дуҫлыҡҡа хыянат

**ПРЕДА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*изменнически выдать*) хыянат итеү, тотоп биреү, хыянатсыл (хыянат ҡылып) һатыу **2.** (*нарушить верность*) һатыу, хыянат итеү; **преда́ть Ро́дину** Тыуған ил-

де һатыу **3.** (*подвергнуть чему-л.*) биреү; **преда́ть суду́** судҡа биреү ♦ **преда́ть гла́сности** фашлау; **преда́ть забве́нию** онотоу; **преда́ть земле́** ерләү, ергә күмеү; **преда́ть огню́ и мечу́** емереп, яндырып ташлау

**ПРЕДА́ТЬСЯ** *сов. чему* бирелеү, сумыу; **преда́ться тоске́** һағышҡа сумыу

**ПРЕДБА́ННИК** *м* мунса алды

**ПРЕДВАРЕ́НИЕ** *с*; *уст. см.* **предвари́ть** — **предваря́ть**

**ПРЕДВАРИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* алдан, баштан, көн элгәре, элек; **предвари́тельно позвони́ть** алдан шылтыратыу

**ПРЕДВАРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** алдан, алдан уҡ, көн элгәре, тиклем, баштағы; **предвари́тельные перегово́ры** алдан һөйләшеүҙәр, **предвари́тельное заключе́ние** *юр.* судҡа тиклем ҡулға алыу **2.** алдан; **предвари́тельная прода́жа биле́тов** билеттарҙы алдан һатыу

**ПРЕДВАРИ́ТЬ** *сов. что* (*сделать что-л. раньше чего-л.*) алдан сараһын күреп ҡуйыу, алдан эшләп ҡуйыу; **предвари́ть собы́тия** ваҡиғаларҙан алда сараһын күреп ҡуйыу

**ПРЕДВАРЯ́ТЬ** *несов. см.* **предвари́ть**

**ПРЕДВЕ́СТИЕ** *с* билге, ғәләмәт, хәбәр; **предве́стие весны́** яҙ билгеләре

**ПРЕДВЕ́СТНИК** *м* хәбәрсе, белгертеүсе, билдә; **предве́стник бу́ри** дауыл хәбәрсеһе; **предве́стники боле́зни** ауырыу билдәләре

**ПРЕДВЕЩА́ТЬ** *несов. что* **1.** (*предсказывать*) эшкәртеү, алдан белдереү, алдан хәбәр биреү **2.** (*служить предзнаменованием*) алдан белдереп ҡуйыу, һиҙҙереп (күрһәтеп) тороу; **ту́чи предвеща́ли грозу́** болоттар йәшенле ямғыр буласағын алдан күрһәтеп тора ине

**ПРЕДВЗЯ́ТОСТЬ** *ж* алдан уҡ билдәле фекерҙә (уйҙа) булыу

**ПРЕДВЗЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое алдан уҡ тупланған, алдан бер ҡарашҡа (фекергә, уйға) килгән (*ысынбарлыҡты иҫәпкә алмаған*); **предвзя́тое мне́ние** алдан уҡ тупланған фекер

**ПРЕДВИ́ДЕНИЕ** *с см.* **предви́деть**; **предви́дение собы́тий** ваҡиғаларҙы алдан күреү

**ПРЕДВИ́ДЕТЬ** *сов. что* алдан күреү (һиҙенеү, иҫкәртеү); **спосо́бный предви́деть** алдан күреүгә һәләтле

**ПРЕДВКУША́ТЬ** *несов. что* алдан ләззәтләнеү, көн элгәре кинәнеү; **предвкуша́ть успе́х** алдағы уңышҡа көн элгәре кинәнеү

**ПРЕДВКУШЕ́НИЕ** *с см.* **предвкуша́ть**

**ПРЕДВОДИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПРЕДВОДИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* юлбашсы, ҡорбаш, башлыҡ; **быть предводи́телем наро́да** халыҡҡа юлбашсы булыу ♦ **предводи́тель дворя́нства** *уст.* дворяндар ҡорбашы (*дворяндар һайлап ҡуйған етәксе*)

**ПРЕДВОДИ́ТЕЛЬСТВО** *с* юлбашсылыҡ, етәкселек; **под предводи́тельством** етәкселегендә

**ПРЕДВОДИ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов. кем-чем* юлбашсылыҡ итеү, етәкселек итеү, башлыҡ булыу

**ПРЕДВОЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое һуғыш алдынан булған, һуғышҡа ҡәҙәр, һуғыш алды ...ы; **предвое́нные го́ды** һуғыш алды йылдары

**ПРЕДВОСХИ́ТИТЬ** *сов. что*; *книжн.* башҡаларҙан алда белеү, көн элгәре һиҙенеү, (алдан) өлгөрөү; **предвосхи́тить откры́тие** *чьё-л.* *кемдеңдер* алдынан асыш яһап өлгөрөү

**ПРЕДВОСХИЩА́ТЬ** *несов. см.* **предвосхи́тить**

**ПРЕДВЫ́БОРНЫЙ,** -ая, -ое һайлау алды, һайлау алдында булған; **предвы́борная кампа́ния** һайлау алды кампанияһы

**ПРЕДГО́РНЫЙ,** -ая, -ое тау янындағы, тау эргәһендәге (итәгендәге)

**ПРЕДГО́РЬЕ** *с* тау алды (итәге яны, ҡыҙырымы)

**ПРЕДГРОЗОВО́Й,** -ая, -ое йәшен (дауыл) алдындағы; **предгрозова́я тишина́** йәшен алдындағы тынлыҡ

**ПРЕДДВЕ́РИЕ** *с* **1.** ишек төбө, ишек алды, яҡын-тирә; **преддве́рие дворца́** һарайҙың ишек алды **2.** *анат.* алды; **преддве́рие горта́ни** ҡурылдай алды **3.** *перен.* алды, башы; **в преддве́рии револю́ции** инҡилап алдынан

**ПРЕДДИПЛО́МНЫЙ,** -ая, -ое диплом алды ...ы; **преддипло́мная пра́ктика** диплом алды практикаһы

**ПРЕДЕ́Л** *м* **1.** (*край, конечная часть чего-л.*) сик, ҡыр; **переходи́ть преде́л** сиктән сығыу; **дойти́ до преде́ла** сиккә етеү; **нет преде́ла** сиге юҡ **2.** *мн.* **преде́лы** (*рубежи*) эс, сит, сик; **за преде́лами страны́** илдән ситтә; **преде́лы о́бласти** өлкәнең сиге **3.** (*ограниченный какими-л. сроками промежуток времени*) эсендә, тирәһендә; **в преде́лах го́да** йыл эсендә **4.** *перен.* юғары дәрәжә, сик; **преде́л жела́ний** теләктәрҙең сиге **5.** *спец.* сикләмә, сик; **преде́л фу́нкции** функцияның сикләмәһе; **преде́л упру́гости** ҡайталыусанлыҡ сиге

**ПРЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое иң һуңғы (сикке), аҡтыҡҡы, иң, сик ...ы; **преде́льный у́гол** *мат.* сик мөйөшө; **преде́льная ско́рость** иң ҙур тиҙлек

**ПРЕДЗАКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое ҡояш байыр алдындағы; **предзака́тное не́бо** ҡояш байыр алдындағы күк

**ПРЕДЗНАМЕНОВА́НИЕ** *с* (алдан белдереүсе) билдә, ғәләмәт, алдағыны белгерткән, (эшкәрткән) билге; **хоро́шее предзнаменова́ние** яҡшылыҡҡа булған билге

**ПРЕДИКА́Т** *м* **1.** *лог.* предикат (*логик хәбәр*) **2.** *грам.* предикат, хәбәр

**ПРЕДИКАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *лог.* предикатив **2.** *грам.* хәбәр ...ы, хәбәрлекле, предикатив; **предикати́вное прилага́тельное** предикатив сифат

**ПРЕДИСЛО́ВИЕ** *с* баш һүҙ, инеш һүҙ, инеш; **предисло́вие кни́ги** китаптың инеш һүҙе ♦ **без предисло́вий** оҙонға һуҙмай

**ПРЕДЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **предложи́ть**

**ПРЕДЛО́Г I** *м* (*повод к чему-л.*) һылтау, дәлил, сәбәп; **под предло́гом боле́зни** ауырыу һылтауы менән

**ПРЕДЛО́Г II** *м*; *грам.* предлог, бәйлек (*урыҫ һ.б. телдәрҙәге һүҙ алдынан килә торған ярҙамсы һүҙҙәр, мәҫ.*, *“в”*, *“на”*, *“у”*)

**ПРЕДЛОЖЕ́НИЕ I** *с* **1.** *см.* **предложи́ть 2.** тәкдим; **делово́е предложе́ние** эшлекле тәкдим; **внести́ предложе́ние** тәкдим индереү **3.** (*просьба вступить в брак*) тәкдим; **сде́лать предложе́ние** тәкдим яһау **4.** *эк.* (*поступление товаров на рынок*) (тауарҙы) һатыуға сығарыу

**ПРЕДЛОЖЕ́НИЕ II** *с* **1.** *грам.* һөйләм; **назывно́е предложе́ние** атама һөйләм; **распространённое предложе́ние** таркау һөйләм **2.** *лог.* (*суждение*) хөкөм, һүҙ

**ПРЕДЛОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *с неопр.* тәкдим итеү, күрһәтеү; **предложи́ть по́мощь** ярҙам тәкдим итеү; **предложи́ть кандидату́ру** кандидатура күрһәтеү **2.** *что* (*предложить выполнить*) биреү, тәкдим итеү; **предложи́ть тру́дную зада́чу** ҡыйын мәсьәлә биреү **3.** *что* и *с неопр.* (*потребовать, предписать*) ҡушыу, талап итеү; **предложи́ть удали́ться** китеүҙе талап итеү ♦ **предложи́ть ру́ку и се́рдце** *кому*; *уст.* тәкдим яһау (*үҙенә кейәүгә сығыуын һорау*)

**ПРЕДЛО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* предлоглы; **предло́жная констру́кция** предлоглы конструкция ♦ **предло́жный паде́ж** предложный падеж (килеш)

**ПРЕДМА́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Беренсе май (байрамы) алды …ы; **предма́йские дни** Беренсе май алды көндәре

**ПРЕДМЕ́СТЬЕ** *с* биҫтә, ҡала эргәһе (*ҡала тирәһендәге урын*)

**ПРЕДМЕ́Т** *м* **1.** нәмә, әйбер, кәрәк-яраҡ; **тяжёлый предме́т** ауыр нәмә; **предме́ты дома́шнего обихо́да** өй кәрәк-яраҡтары **2.** (*тема*) предмет, тема, нәмә; **предме́т спо́ра** бәхәс темаһы **3.** фән, предмет; **уче́бные предме́ты** уҡыу фәндәре **4.** (*объект деятельности, состояния*) аҙыҡ, нәмә; **предме́т за́висти** көнсөллөк аҙығы ♦ **на э́тот (сей) предме́т** был турала

**ПРЕДМЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** предмет …ы, предметлы …ы; **предме́тное значе́ние** предметлы мәғәнәһе **2.** (*наглядный*) күргәҙмәле; **предме́тный уро́к** күргәҙмәле дәрес ♦ **предме́тная систе́ма преподава́ния** фәндәргә айырып уҡытыу системаһы

**ПРЕДНАЗНАЧА́ТЬ** *несов. см.* **предназна́чить**

**ПРЕДНАЗНАЧА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **предназнача́ть**

**ПРЕДНАЗНАЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **предназна́чить 2.** *высок.* (*судьба*) яҙмыш, күрәсәк, тәкдир; **ве́рить в своё предназначе́ние** үҙ тәкдиреңә ышаныу

**ПРЕДНАЗНА́ЧИТЬ** *сов. кого-что* билгеләү, тәғәйенләү, атау; **предназна́чить де́ньги для похо́да** аҡсаны поход өсөн тәғәйенләү

**ПРЕДНАМЕ́РЕННО** *нареч.* юрамал, алдан уйлап

**ПРЕДНАМЕ́РЕННОСТЬ** *ж* алдан уйланғанлыҡ, алдан уйлап (аңлы рәүештә) эшләнгәнлек

**ПРЕДНАМЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое алдан уйлап эшләнгән, аңлы рәүештә эшләнгән

**ПРЕДНАЧЕРТА́НИЕ** *с*; *высок.* алдан билдәләнгән күрһәтмә, алдан билдәләнеп ҡуйылыу; **сле́довать предначерта́ниям** *чьим-л. кемдеңдер* алдан билдәләнгән күрһәтмәләренә эйәреү

**ПРЕДНАЧЕРТА́ТЬ** *сов. что* и *с неопр.*; *высок.* алдан билдәләү, юл һыҙыу, алдан билдәләп (күрһәтеп) ҡуйыу

**ПРЕДНОВОГО́ДНИЙ,** -яя, -ее Яңы йыл (байрамы) алды …ы; **предновогóдняя ночь** Яңы йыл алды төнө

**ПРЕДО** *предлог см.* **пред**

**ПРЕДО…** *приставка см.* **пред…**

**ПРЕДОБЕ́ДЕННЫЙ,** -ая, -ое төш алды, төшкө аш алдындағы

**ПРЕ́ДОК** *м* **1.** төп ата (әсә), боронғо ата-баба, боронғо баба (*ырыу башы*) **2.** *мн.* **пре́дки** ата-бабалар, оло быуындар

**ПРЕДОКТЯ́БРЬСКИЙ,** -ая, -ое Октябрь ихтилалы алды …ы

**ПРЕДОЛИМПИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Олимпиада алды …ы

**ПРЕДОПЕРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** операция алды …ы, операция алдынан булған **2.** *в знач. сущ.* **предоперацио́нная** *ж* операция бүлмәһенең алды

**ПРЕДОПРЕДЕ́ЛЕНИЕ** *с* **1.** *см.* **предопредели́ть — предопределя́ть 2.** *уст.* (*судьба*) яҙмыш, тәкдир

**ПРЕДОПРЕДЕЛИ́ТЬ** *сов. что* алдан билдәләү (билдәләп ҡуйыу); **предопредели́ть судьбу́** яҙмышты алдан билдәләп ҡуйыу

**ПРЕДОПРЕДЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **предопредели́ть**

**ПРЕДОПРЕДЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **предопределя́ть**

**ПРЕДОСТА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, кому* (*дать в пользование*) биреү; **предоста́вить свою́ ко́мнату го́стю** үҙ бүлмәңде ҡунаҡҡа биреү **2.** *кому, что* и *с неопр.* (*дать возможность делать что-л.*) биреү, ирек биреү, иркенә ҡуйыу, ихтыяр биреү, мөмкинлек биреү; **предоста́вить пра́во** хоҡуҡ биреү ♦ **предоста́вить самому́ себе́**: 1) үҙ ыңғайына (иркенә) ҡуйыу; 2) үҙ ҡарамағына ҡалдырыу

**ПРЕДОСТАВЛЕ́НИЕ** *с см.* **предоста́вить — предоставля́ть**; **предоставле́ние кварти́ры** фатир биреү

**ПРЕДОСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **предоста́вить**

**ПРЕДОСТАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **предоставля́ть**

**ПРЕДОСТЕРЕГА́ТЬ** *несов. см.* **предостере́чь**

**ПРЕДОСТЕРЕЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **предостере́чь** — **предостерега́ть** **2.** алдан иҫкәртеү, киҫәтеү; **официа́льное предостереже́ние** рәсми киҫәтеү

**ПРЕДОСТЕРЕ́ЧЬ** *сов. кого-что* иҫкәртеү, киҫәтеү, иҫкәртеп ҡуйыу, һаҡ булырға ҡушыу; **предостере́чь от оши́бок** хаталарҙан иҫкәртеү

**ПРЕДОСТОРО́ЖНОСТЬ** *ж* һаҡлыҡ, һаҡланыу, абай булыу; **ме́ры предосторо́жности** һаҡлыҡ саралары

**ПРЕДОСУДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ғәйеп итерлек (ғәйепкә алырлыҡ) булыу

**ПРЕДОСУДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ғәйеп итерлек, ғәйепкә алырлыҡ

**ПРЕДОТВРАТИ́ТЬ** *сов. что* булдырмау, булдырмау сараһын күреү, юл ҡуймау; **предотврати́ть опа́сность** ҡурҡынысты булдырмау

**ПРЕДОТВРАЩА́ТЬ** *несов. см.* **предотврати́ть**

**ПРЕДОТВРАЩЕ́НИЕ** *с см.* **предотврати́ть** — **предотвраща́ть**; **предотвраще́ние агре́ссии** баҫҡынсылыҡҡа юл ҡуймау

**ПРЕДОХРАНЕ́НИЕ** *с см.* **предохрани́ть** — **предохранять**, **предохрани́ться** — **предохраня́ться**; **предохране́ние де́рева от гние́ния** ағасты сереүҙән һаҡлау

**ПРЕДОХРАНИ́ТЕЛЬ** *м* һаҡлағыс; **пла́вкий предохрани́тель** тиҙ иреүсән һаҡлағыс

**ПРЕДОХРАНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һаҡлаусы, һаҡлыҡ ...ы, һаҡлай торған, һаҡлағыс ...ы; **предохрани́тельные риви́вки** *мед.* һаҡлағыс прививкалар

**ПРЕДОХРАНИ́ТЬ** *сов. кого-что* һаҡлау, һаҡлап алып ҡалыу

**ПРЕДОХРАНИ́ТЬСЯ** *сов.* һаҡланыу, һаҡланып ҡалыу

**ПРЕДОХРАНЯ́ТЬ** *несов. см.* **предохрани́ть**

**ПРЕДОХРАНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **предохрани́ться** **2.** *страд. от* **предохраня́ть**

**ПРЕДПИСА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **предписа́ть** **2.** (*официальное распоряжение*) бойороҡ, бойороу, әмер; **секре́тное предписа́ние** йәшерен бойороҡ **3.** (*то, что предписано соблюдать*) кәңәш, ҡушыу; **предписа́ние врача́** табиб кәңәше

**ПРЕДПИСА́ТЬ** *сов. кому, что* и *с неопр.* **1.** (*приказать*) бойороҡ биреү, ҡушыу, бойороу **2.** (*назначить*) билдәләү, ҡушыу, тәҡдим итеү; **предписа́ть посте́льный режи́м** ятып торорға ҡушыу

**ПРЕДПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **предписа́ть**

**ПРЕДПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **предпи́сывать**

**ПРЕДПЛЕЧЕВО́Й,** -ая, -ое ҡушар ...ы; **предплечева́я кость** ҡушар һөйәге

**ПРЕДПЛЕ́ЧЬЕ** *с; анат.* ҡушар (һөйәге), беләк; **мы́шцы предпле́чья** ҡушар мускулдары

**ПРЕДПЛУ́ЖНИК** *м; с.-х.* алтөрән; **прикрепи́ть предплу́жник к плу́гу** һабанға алтөрән беркетеү

**ПРЕДПЛЮСНА́** *ж; анат.* тулаһыҡ, ҡушарбаш, шайтан тубыҡ (*кешеләрҙә*); кәтмән алды (*хайуандарҙа — аяҡ башынан сираҡ менән йәнәш ятҡан өлөшө*)

**ПРЕДПОЛАГАЕ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **предполага́ть** **2.** *прил.* алдан уйланған, самалап ҡуйылған, сама менән әйтелгән

**ПРЕДПОЛАГА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **предположи́ть** **2.** *с неопр.* (*иметь намерение*) ниәт итеү, уйлау, -маҡ/-мәк булыу, иҫәпләү; **предполага́ть уе́хать** китергә уйлау **3.** *что* (*иметь условием*) талап (шарт) итеү, һорау

**ПРЕДПОЛАГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** уйланыу, күҙ уңында тотолоу, фараз ителеү; **предполага́ется получи́ть большо́й урожа́й** мул уңыш алыу күҙ уңында тотола **2.** *страд. от* **предполага́ть**

**ПРЕДПОЛОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** (*догадка*) алдан самалау, уйлау, иҫәп; **предположе́ние оказа́лось пра́вильным** иҫәп дөрөҫ булып сыҡты **2.** (*план, замысел*) фараз, ниәт, уй

**ПРЕДПОЛОЖИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* самаланғанлыҡ, фараз ителгәнлек

**ПРЕДПОЛОЖИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое фараз ителгән, алдан сығарылған, сама менән сығарылған, уйланылған; **предположи́тельный вы́вод** фараз ителгән һығымта

**ПРЕДПОЛОЖИ́ТЬ** *сов. что* фараз итеү, уйлау, тип уйлау, икән тиеү, булһын тиеү

**ПРЕДПОСЕВНО́Й,** -ая, -ое сәсеү алды (алдынан); **предпосевны́е рабо́ты** сәсеү алды эштәре

**ПРЕДПОСЛА́ТЬ** *сов. что, чему* инеш рәүешендә әйтеү (әйтеп китеү); **предпосла́ть докла́ду замеча́ния** докладҡа инеш рәүешендә иҫкәрмәләр әйтеп китеү

**ПРЕДПОСЛЕ́ДНИЙ,** -яя, -ее һуңғынан алдағы, һуңғының алдындағы(һы); **предпосле́дний но́мер журна́ла** журналдың һуңғынан алдағы һаны

**ПРЕДПОСЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **предпосла́ть**

**ПРЕДПОСЫ́ЛКА** *ж* **1.** (*предварительное условие*) тәүшарт, алғы шарт; **созда́ть необходи́мые предпосы́лки** тейешле тәүшарттар тыуҙырыу **2.** (*исходный пункт рассуждения*) таяныс шарт, нигеҙ шарт; **исходи́ть из пра́вильной предпосы́лки** дөрөҫ нигеҙ шарттарҙан сығыу

**ПРЕДПОЧЕ́СТЬ** *сов. кого-что, кому-чему* и *с неопр.* артығыраҡ күреү, ярата төшөү, яҡшыраҡ күреү, өҫтөн һанау; **предпоче́сть идти́ пешко́м** йәйәү барыуҙы яҡшыраҡ күреү

**ПРЕДПОЧИТА́ТЬ** *несов. см.* **предпоче́сть**

**ПРЕДПОЧТЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **предпоче́сть** — **предпочита́ть**; **ока́зывать предпочте́ние** артыҡ

күреү **2.** (*преимущественное внимание*) артыҡ хөрмәт (ихтирам)

**ПРЕДПОЧТИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* яҡшыраҡ күрелеү, артығыраҡ (уңайлыраҡ) булыу

**ПРЕДПОЧТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое иң яҡшы(һы), иң уңайлы(һы), иң ҡулай(ы)

**ПРЕДПРА́ЗДНИЧНЫЙ,** -ая, -ое байрам алды; **предпра́здничная пора́** байрам алды ваҡыты

**ПРЕДПРИИ́МЧИВОСТЬ** *ж* йүнселлек, булдыҡлылыҡ, тернәкселлек

**ПРЕДПРИИ́МЧИВЫЙ,** -ая, -ое йүнсел, булдыҡлы, эшлекле, тернәксел; **предприи́мчивый челове́к** йүнсел кеше

**ПРЕДПРИНИМА́ТЕЛЬ** *м* **1.** предприятие (кәсепхана) хужаһы, предприятие тотоусы; **кру́пный предпринима́тель** эре предприятие хужаһы **2.** (*делец*) эшҡыуар, йүнсел, эшкә сос

**ПРЕДПРИНИМА́ТЬ** *несов. см.* **предприня́ть**

**ПРЕДПРИНЯ́ТЬ** *сов. что* тотоноу, керешеү, башлау, -ырға/-ергә булыу, ынтылып ҡарау; **предприня́ть пое́здку** барып килергә булыу; **предприня́ть нау́чное иссле́дование** фәнни тикшеренеүгә керешеү

**ПРЕДПРИЯ́ТИЕ** *с* **1.** *эк.* предприятие, кәсепхана (*завод, фабрика һ.б.*); **госуда́рственное предприя́тие** дәүләт предприятиеһы; **рабо́тать на предприя́тии** предприятиела эшләү **2.** (*предпринятое дело*) эш, тотонған (керешкән) кәсеп (эш)

**ПРЕДРАСПОЛАГА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **предрасположи́ть 2.** *кого, к чему* тыуҙырыу, теләк килтереү, ынтылдырыу; **дождь предрасполага́ет ко сну** ямғыр йоҡоно килтерә

**ПРЕДРАСПОЛОЖЕ́НИЕ** *с* и **ПРЕДРАСПОЛО́ЖЕННОСТЬ** *ж* **1.** (*склонность*) һәүәҫлек, һәләтлелек, мәйел, күңел ятыу; **предрасположе́ние к нау́чной рабо́те** фәнни эшкә күңел ятыу **2.** (*к заболеваниям*) бирешеүсәнлек, кенә (ҡына) барыу; **предрасполо́женность к просту́де** һыуыҡ тейеп кенә барыу

**ПРЕДРАСПОЛОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого, к чему* алдан әҙерләп ҡуйыу (*рухи яҡтан*), (күңелен, уйын) ауҙарыу (бороу); **предрасположи́ть в свою́ по́льзу** үҙ яғына күңелен ауҙарыу **2.** *в ф. причастия* бирешеүсән, һәүәҫ, аҙғын; **она́ предрасполо́жена к просту́дным заболева́ниям** ул һалҡынға бирешеүсән

**ПРЕДРАССВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое таңғы, таң алды ...ы; **предрассве́тный ветеро́к** таң алды еле

**ПРЕДРАССУ́ДОК** *м* хөрәфәт, юҡ-барға ышаныу; **религио́зный предрассу́док** дини хөрәфәт

**ПРЕДРЕКА́ТЬ** *несов. см.* **предре́чь**

**ПРЕДРЕ́ЧЬ** *сов.*; *книжн. см.* **предсказа́ть**

**ПРЕДРЕША́ТЬ** *несов. см.* **предреши́ть**

**ПРЕДРЕШИ́ТЬ** *сов. что* алдан хәл итеү, көн элгәре хәл итеп ҡуйыу, алдан билдәләү

**ПРЕДРО́СТОК** *м*; *бот.* үҫенте (*ҡайһы бер споралы үҫемлектәрҙә, мүктәрҙә үрсеү быуыны*)

**ПРЕДСЕДА́ТЕЛЬ** *м*; *в разн. знач.* рәйес; **председа́тель правле́ния** идара рәйесе; **рабо́тать председа́телем** рәйес булып эшләү

**ПРЕДСЕДА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое рәйес ...ы; **председа́тельское ме́сто** рәйес урыны; **председа́тельские обя́занности** рәйеслек бурыстары

**ПРЕДСЕДА́ТЕЛЬСТВО** *с* рәйеслек, рәйес вазифаһы

**ПРЕДСЕДА́ТЕЛЬСТВОВАНИЕ** *с*; *разг.* рәйеслек итеү, рәйес булыу

**ПРЕДСЕДА́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов.* рәйеслек итеү, рәйес булыу; **председа́тельствовать на собра́нии** йыйылышта рәйес булыу

**ПРЕДСЕДА́ТЕЛЬСТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее *м* **1.** *прич. от* **председа́тельствовать 2.** *в знач. сущ.* **председа́тельствующий** *м* рәйес, рәйеслек итеүсе

**ПРЕДСЕ́РДИЕ** *с*; *анат.* йөрәк алды (*йөрәктең уң һәм һул алғы бүлексәләре*)

**ПРЕДСКАЗА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **предсказа́ть**; **предсказа́ние пого́ды** һауаның (көндөң) ниндәй булыуын алдан әйтеү **2.** (*предсказанное*) алдан әйткәндәр, юрау, фал; **кни́га предсказа́ний** фал китабы

**ПРЕДСКАЗА́ТЕЛЬ** *м* и **ПРЕДСКАЗА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* күрәҙәсе, юраусы, алдан әйтеүсе, фалсы, фал асыусы; **предсказа́тель судьбы́** яҙмышты юраусы

**ПРЕДСКАЗА́ТЬ** *сов. что* алдан әйтеү, юрау, күрәҙәлек итеү; (*на картах, фасоли и т.д.*) фал (кәрт) һалыу

**ПРЕДСКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **предсказа́ть**

**ПРЕДСМЕ́РТНЫЙ,** -ая, -ое үлем алды, үлеү алдындағы, әжәл ...ы, үлер алдынан; **предсме́ртные слова́** үлер алдынан әйтелгән һүҙҙәр; **предсме́ртный час** әжәл сәғәте

**ПРЕДСТАВА́ТЬ** *несов. см.* **предста́ть**

**ПРЕДСТАВИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПРЕДСТАВИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* **1.** (*доверенное лицо, уполномоченный*) вәкил, илсе; **дипломати́ческий представи́тель** дипломатик вәкил **2.** (*типичный образец*) үрнәк, төр; **представи́тель тропи́ческой фло́ры** тропик бүлкәт флораһының төрө **3.** (*выразитель чьих-л. интересов*) вәкил, кеше; **представи́тель трудя́щихся** хеҙмәтсәндәр вәкиле

**ПРЕДСТАВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һайлаулы, һайланған; **представи́тельные о́рганы вла́сти** властың һайланған органдары **2.** (*полномочный*) вәкәләтле; **представи́тельное собра́ние** вәкәләтле йыйылыш **3.** *разг.* (*солидный*) олпат, мөһабәт; **представи́тельная вне́шность** олпат ҡиәфәт

**ПРЕДСТАВИ́ТЕЛЬСТВО** *с* **1.** вәкиллек, вәкилдәр, вәкәләтлек; **наро́дное представи́тельство** халыҡ вәкиллеге **2.** (*учреждение*) вәкиллек; **торго́вое представи́тельство** сауҙа вәкиллеге

**ПРЕДСТА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*подать на рассмотрение*) биреү, тапшырыу; **предста́вить от-**

**чёт** отчёт тапшырыу, иҫәп-хисап биреү; **предста́вить спи́сок сотру́дников** хеҙмәткәрҙәрҙең исемлеген биреү **2.** *кого-что, к чему (к награде, повышению)* күрһәтеү, тәҡдим итеү **3.** *кого (познакомить с кем-л.)* таныштырыу; **предста́вить го́стя** ҡунаҡ менән таныштырыу **4.** *кого-что (вообразить)* күҙ алдына килтереү; **я́сно предста́вить себе́ бу́дущее** киләсәкте күҙ алдына асыҡ килтереү **5.** *что (предъявить, показать)* биреү, күрһәтеү, килтереү; **предста́вить удостовере́ние** танытма күрһәтеү; **предста́вить доказа́тельства** дәлилдәр килтереү **6.** *кого-что (изобразить)* ҡыланыу, ҡыланып күрһәтеү, һүрәтләү **7.** *что (причинить, вызвать)* килтереү; **э́то не предста́вит никаки́х затрудне́ний** был бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ килтермәҫ ♦ **предста́вьте себе́** *в знач. вводн. сл.* йә ҡарағыҙ инде, уйлап ҡарағыҙ

**ПРЕДСТА́ВИТЬСЯ** *сов.* **1.** *кому* и *без доп.* *(отрекомендоваться)* үҙен танытыу, үҙе менән таныштырыу **2.** *кому (явиться в воображении)* күҙ алдына килеү, күҙгә күренеү **3.** *кому (померещиться)* һымаҡ (кеүек) булып күренеү (тойолоу); **ему́ предста́вилось, что кто́-то прошёл в ко́мнату** уға кемдер бүлмәгә үтеп киткән һымаҡ булып күренде **4.** *(возникнуть, появиться)* тыуыу, күренеү, килеп сығыу; **мне предста́вилось стра́нное зре́лище** миңә сәйер бер тамаша күренде; **предста́вился удо́бный слу́чай** уңайлы осраҡ килеп сыҡты **5.** *кем-чем (притвориться) разг.* ҡыланыу, -ға/-гә һалышыу; **предста́виться больны́м** ауырыуға һалышыу **6.** *кому-чему (показаться каким-л.)* килеп баҫыу, пәйҙә булыу

**ПРЕДСТАВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **предста́вить — представля́ть, предста́виться — представля́ться; представле́ние к пре́мии** премияға тәҡдим итеү; **представле́ние спра́вки** белешмә биреү **2.** *(официальная бумага)* рәсми тәҡдим, күрһәтмә **3.** *театр. (спектакль)* тамаша, кәмит; **пока́зывать представле́ние** тамаша күрһәтеү **4.** *филос., психол.* төшөнсә, аңлау, күҙ алдына килтереү, күҙаллау **5.** *(понимание кого-чего-л.)* аңлау, белеү, төшөнсә; **представле́ние о жи́зни** тормош тураһында төшөнсә; **соста́вить преставле́ние** *о чём-л. нимәлер* тураһында төшөнсә булдырыу

**ПРЕДСТАВЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **предста́вить 2.** *кого-что (быть, являться чьим-л. представителем)* вәкиле булыу, исеменән эш алып барыу; **представля́ть организа́цию** ойошманың вәкиле булыу **3.** *что (быть выразителем чьих-л. взглядов, мнений и т.п.)* күҙәтеү, яҡлау, сағылдырыу; **представля́ть интере́сы наро́да** халыҡ мәнфәғәтен яҡлау

**ПРЕДСТАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **предста́виться 2.** *страд. от* **представля́ть** 1

**ПРЕДСТА́ТЬ** *сов. перед кем-чем, кому-чему* и *без доп.* алдына килеп (сығып, барып) баҫыу; **предста́ть пе́ред зри́телями** тамашасылар алдына сығып баҫыу

**ПРЕДСТОЯ́ТЬ** *несов. кому* алда тороу, -һы/-һе булыу, көтөлөү; **нам предстои́т тру́дная рабо́та** беҙҙең алда ауыр эш тора

**ПРЕДСТОЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **предстоя́ть 2.** *прил.* алдағы, алғы, буласаҡ; **предстоя́щая рабо́та** алдағы эш **3.** *в знач. сущ.* **предстоя́щее** *с* күрәсәк, киләһе; **мы́сли о предстоя́щем** күрәсәк хаҡында уйҙар

**ПРЕДСЪЕ́ЗДОВСКИЙ,** -ая, -ое съезд алдынан, съезд алды ...ы; **предсъе́здовская диску́ссия** съезд алдынан бәхәс

**ПРЕДУБЕДИ́ТЬ** *сов. кого-что; уст.* алдан (көн элгәре) ышандырыу, алдан ышандырып (кире фекер тыуҙырып) ҡуйыу

**ПРЕДУБЕЖДА́ТЬ** *несов. см.* **предубеди́ть**

**ПРЕДУБЕЖДЕ́НИЕ** *с* алдан уҡ кире фекер (насар ҡараш), тиҫкәре мөнәсәбәт

**ПРЕДУБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое урып йыйыу алдынан, ураҡ алды ...ы; **предубо́рочные рабо́ты** ураҡ алды эштәре

**ПРЕДУВЕ́ДОМИТЬ** *сов. кого-что; уст.* алдан белдереү (киҫәтеү), алдан хәбәр итеп ҡуйыу

**ПРЕДУВЕДОМЛЕ́НИЕ** *с; уст. см.* **предуве́домить — предуведомля́ть**

**ПРЕДУВЕДОМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **предуве́домить**

**ПРЕДУГАДА́ТЬ** *сов. что* алдан (көн элгәре) күреү (һиҙеү, белеү)

**ПРЕДУГА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **предугада́ть**

**ПРЕДУДА́РНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* баҫым алдындағы, баҫым алды ...ы; **предуда́рный слог** баҫым алдындағы ижек

**ПРЕДУМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое алдан уйлап эшләнгән, берәй ниәт менән эшләнгән, юрый эшләнгән; **предумы́шленный посту́пок** юрый эшләнгән эш

**ПРЕДУПРЕДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* иғтибарлылыҡ, кеселекле булыу, кешенең күңелен табыу

**ПРЕДУПРЕДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *(предупреждающий)* һаҡлыҡ ...ы, киҫәтеү ...ы, һаҡлыҡ өсөн булған; **предупреди́тельные ме́ры** һаҡлыҡ саралары **2.** *(любезный)* кеселекле, иғтибарлы, ихтирамлы

**ПРЕДУПРЕДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, о чём (заранее известить)* алдан белдереү, иҫкәртеү, алдан хәбәр итеү; **вас предупреди́ли?** һеҙҙе иҫкәрттеләрме? **2.** *что (предотвратить)* булдырмау, юл ҡуймау, иҫкәртеү; **предупреди́ть пожа́р** янғынды булдырмау **3.** *кого-что (опередить)* алдан хәстәрен күреү

**ПРЕДУПРЕЖДА́ТЬ** *несов. см.* **предупреди́ть**

**ПРЕДУПРЕЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **предупреди́ть — предупрежда́ть; предупрежде́ние заболева́ний** ауырыуҙы алдан иҫкәртеү **2.** *(предупреждающее замечание и т.п.)* иҫкәртеү, киҫә-

теү; **сде́лать предупрежде́ние** иҫкәртеү яһау; **вы́говор с предупрежде́нием** иҫкәртеүле шелтә

**ПРЕДУСМА́ТРИВАТЬ** *несов. см.* **предусмотре́ть**

**ПРЕДУСМА́ТРИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **предусма́тривать**

**ПРЕДУСМОТРЕ́ТЬ** *сов. что* алдан күреү (иҫәпкә алыу), күҙҙә (күҙ уңында) тотоу; **предусмотре́ть все слу́чаи** һәр осраҡты күҙ уңында тотоу

**ПРЕДУСМОТРИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* һаҡлыҡ, алдын-артын уйлау, алдан күрә белеү, хәстәрлелек

**ПРЕДУСМОТРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое алдан күреүсән (күрә белеүсе), алдан сара күреүсән, хәстәрле; **предусмотри́тельный челове́к** алдан күрә белеүсе кеше

**ПРЕДЧУ́ВСТВИЕ** *с* һиҙем, алдан һиҙеү (тойоу), һиҙемләү, күңел тойоу; **предчу́вствие не обману́ло** һиҙем алдаманы

**ПРЕДЧУ́ВСТВОВАТЬ** *несов. что* һиҙемләү, һиҙенеү, алдан тойоу (һиҙеү); **предчу́вствовать зара́нее** алдан һиҙемләү

**ПРЕДШЕ́СТВЕННИК** *м* и **ПРЕДШЕ́СТВЕННИЦА** *ж* **1.** элгәр, алдан (элек) булған, башлап ебәреүсе; **быть предше́ственником** элгәр булыу **2.** (*по должности*) элек эшләүсе, алда эшләүсе, элек эшләгән кеше; **мой предше́ственник** минән элек эшләгән кеше

**ПРЕДШЕ́СТВОВАТЬ** *несов. чему* алдынан (алдан) булыу (булып алыу, алып барыу); **похо́ду предше́ствовала больша́я подгото́вка** сәйәхәткә алдан ҙур әҙерлек алып барылды

**ПРЕДШЕ́СТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **предше́ствовать 2.** *прил.* бынан элекке, үткән, бынан алда (элек) булған; **на предше́ствующем заня́тии** үткән дәрестә

**ПРЕДЪ...** *приставка см.* **пред...**

**ПРЕДЪЯВИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПРЕДЪЯВИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* **1.** күрһәтеүсе, күрһәткән кеше; **предъяви́тель удостовере́ния** танытма күрһәтеүсе **2.** тапшырыусы, килтереп биреүсе; **предъяви́тель письма́** хат тапшырыусы

**ПРЕДЪЯВИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*показать*) күрһәтеү, килтереп күрһәтеү; **предъяви́ть докуме́нт** документ күрһәтеү **2.** (*заявить о чём-л., требуя объяснения*) белдереү, юллау, талап ҡуйыу

**ПРЕДЪЯВЛЕ́НИЕ** *с см.* **предъяви́ть** — **предъявля́ть**; **предъявле́ние и́ска** *юр.* иск юллау; **предъявле́ние обвине́ния** ғәйепләү белдереү

**ПРЕДЪЯВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **предъяви́ть**

**ПРЕДЪЯВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **предъявля́ть**

**ПРЕДЫДУ́ЩИЙ,** -ая, -ее (бынан) алдағы, үткән, бынан элекке; **на предыду́щем заня́тии** үткән дәрестә

**ПРЕДЫНФА́РКТНЫЙ,** -ая, -ое инфаркт алды ...ы, инфарктҡа тиклем булған; **предынфа́рктное состоя́ние** инфаркт алды хәле

**ПРЕЕ́МНИК** *м* и **ПРЕЕ́МНИЦА** *ж* **1.** (*наследник*) вариҫ, урынына ҡалған кеше **2.** (*последователь*) дауам иттереүсе **3.** (*тот, кто занял место своего предшественника*) алмашҡа килеүсе

**ПРЕЕ́МСТВЕННОСТЬ** *ж* **1.** мираҫлыҡ, вариҫлыҡ **2.** күсәгилешлелек, эҙмә-эҙлеклелек, бер-бер артлы булғанлыҡ; **прее́мственность тради́ций** традицияларҙың күсәгилешлелеге

**ПРЕЕ́МСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*наследственный*) мираҫ булып килгән, быуындан-быуынға күсеп килә торған; **прее́мственный поря́док насле́дования** *юр.* вариҫтың быуындан-быуынға күсеп килә торған тәртибе **2.** (*последовательный*) күсәгилешле; **прее́мственная связь** күсәгилешле бәйләнеш

**ПРЕ́ЖДЕ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* (*раньше*) (бынан) элек, элгәре; **пре́жде я не знал их** элек мин уларҙы белмәй инем **2.** *нареч.* (*сначала*) тәүҙә, әүәл, башта, алдан; **пре́жде взве́шивай, а пото́м де́лай** алдан үлсәп ҡара, шунан эшлә **3.** *предлог с род. п.* (*раньше кого-л.*) элек, алда; **прийти́ пре́жде всех** барыһынан да алда килеү ♦ **пре́жде всего́** иң тәүҙә, иң башта

**ПРЕЖДЕВРЕ́МЕННО** *нареч.* алдан, көн элек, иртә, ваҡытһыҙ

**ПРЕЖДЕВРЕ́МЕННОСТЬ** *ж* ваҡыт етмәҫ борон булыу, ваҡытынан алда булыу

**ПРЕЖДЕВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое ваҡытынан элек (алда), иртә, ваҡытһыҙ; **преждевре́менная смерть** ваҡытһыҙ үлем; **преждевре́менные ро́ды** ваҡытынан алда бала табыу

**ПРЕ́ЖНИЙ,** -яя, -ее **1.** әүәлге, иҫке, элекке, үткәндәге; **пре́жний дире́ктор** элекке директор; **пре́жний обы́чай** элекке йола **2.** *в знач. сущ.* **пре́жнее** *с* боронғо(лар), булғандар

**ПРЕЗЕ́НТ** *м*; *шутл.* бүләк

**ПРЕЗЕНТА́БЕЛЬНОСТЬ** *ж* мөһабәтлек, күренеклелек

**ПРЕЗЕНТА́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое олпат, мөһабәт, күренекле

**ПРЕЗЕНТОВА́ТЬ** *сов., несов. что, кому*; *шутл.* бүләк итеү

**ПРЕЗЕРВАТИ́В** *м* презерватив (*буйға ҡалыуҙан, енси ауырыуҙарҙан һаҡланыу сараһы*)

**ПРЕЗЕ́РВЫ** *мн.*; *спец.* презервылар (*стерилизацияһыҙ тоҙлау, ҡаҡлау ысулы менән әҙерләнгән ашамлыҡтар*)

**ПРЕЗИДЕ́НТ** *м* президент (**1.** *рәйес* **2.** *билдәле бер ваҡытҡа һайланып ҡуйылған дәүләт башлығы*); **Президе́нт РБ** БР Президенты

**ПРЕЗИДЕ́НТСКИЙ,** -ая, -ое президент ...ы, президентлыҡ ...ы

**ПРЕЗИДЕ́НТСТВО** *с* **1.** (*должность*) президентлыҡ (*президент вазифаһы*) **2.** (*деятельность президента*) президент булып тороу

**ПРЕЗИ́ДИУМ** *м* президиум; **избра́ть прези́диум** президиум һайлау; **прези́диум съе́зда** ҡоролтай президиумы

**ПРЕЗИРА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* ек күреү, нәфрәт менән (ерәнеп) ҡарау, йән һөймәү, яратмау; **презира́ть тру́са** ҡурҡаҡҡа нәфрәт менән ҡарау **2.** *см.* **презре́ть**; **презира́ть тру́дности** ҡыйынлыҡтарҙан ҡурҡмау

**ПРЕЗРЕ́НИЕ** *с* **1.** (*чувство крайнего неуважения*) ерәнеп (кәмһетеп, нәфрәт менән) ҡарау, ерәнеү, нәфрәт; **выража́ть презре́ние** нәфрәт белдереү **2.** (*пренебрежительное отношение*) иғтибар итмәү, һанға һуҡмау, ҡурҡмау; **презре́ние к сме́рти** үлемдән ҡурҡмау

**ПРЕЗРЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **презре́ть 2.** *прил.* ерәнгес, ерәнес; **презре́нное существо́** ерәнес йән

**ПРЕЗРЕ́ТЬ** *сов. кого-что*; *книжн.* иғтибар итмәү, иҫәпкә алмау, ҡурҡмау; **презре́ть опа́сность** ҡурҡынысҡа иғтибар итмәү

**ПРЕЗРИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* нәфрәтлелек, ерәнеү, ерәнгес булыу

**ПРЕЗРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое нәфрәтле, мыҫҡыллы, кәмһетеүле; **презри́тельный взгляд** нәфрәтле ҡараш; **презри́тельная усме́шка** мыҫҡыллы йылмайыу

**ПРЕЗУ́МПЦИЯ** *ж*; *в разн. знач.* презумпция; **презу́мпция невино́вности** *юр.* ғәйепһеҙлек презумпцияһы (*ғәйепләнеүсенең енәйәт эшләүҙә ғәйепле булыуын законда күрһәтелгән тәртиптә иҫбат иткәнгә тиклем, уны ғәйепһеҙ тип иҫәпләү*)

**ПРЕИМУ́ЩЕСТВЕННО** *нареч.* күбеһенсә, бигерәк, ылғый; **ста́до состои́т преиму́щественно из поро́дистых коро́в** көтөү күбеһенсә тоҡомло һыйырҙарҙан тора

**ПРЕИМУ́ЩЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое өҫтөн, өҫтөнлөклө, өҫтөн булған; **преиму́щественное пра́во** *юр.* өҫтөн хоҡуҡ

**ПРЕИМУ́ЩЕСТВО** *с* **1.** (*превосходство*) өҫтөнлөк, артыҡлыҡ; **большо́е преиму́щество** ҙур өҫтөнлөк; **нет преиму́щества** өҫтөнлөгө юҡ **2.** (*привилегия*) өҫтөнлөк, айырым хоҡуҡ; **получи́ть преиму́щество** өҫтөнлөк алыу ♦ **по преиму́ществу** күбеһенсә, күпселектә

**ПРЕИСПО́ДНЯЯ** *ж* тамуҡ, йәһәннәм

**ПРЕИСПО́ЛНЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **преиспо́лнить 2.** *прил.* (*проникнутый сильным чувством*) тулған, тулып япҡан, бик күп булған; **преиспо́лненный благода́рности** рәхмәттәр менән тулған

**ПРЕИСПО́ЛНИТЬ** *сов. кого-что, чем*; *книжн.* тултырыу, уятыу, тыуҙырыу; **преиспо́лнить ра́достью** шатлыҡ уятыу

**ПРЕИСПО́ЛНИТЬСЯ** *сов. чем, чего* (хис) менән тулыу, шашыныу (ярһыу), хис эскә һыймау; **преиспо́лниться ра́достью** шатлыҡ менән тулыу

**ПРЕИСПОЛНЯ́ТЬ** *несов. см.* **преиспо́лнить**

**ПРИВЯ́ЗАННОСТЬ** *ж* **1.** (*чувство близости, тяготения*) эҫенеү, яҡын күреү, эйәләшкәнлек; **привя́занность к семье́** ғаиләгә эҫенеү **2.** (*предмет привязанности*) эйәләшкән (ғәҙәтләнгән, яратҡан) эш (кеше һ.б.)

**ПРИВЯЗА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (ҡуша) бәйләү, бәйләп ҡуйыу, тағыу; **привяза́ть ло́шадь** атты бәйләп ҡуйыу; **привя́зывать на цепь** сынйырлау **2.** *кого*; *перен.* (*внушить привязанность*) эйәләштереү, эҫендереү

**ПРИВЯЗА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *к кому-чему* (*привязать себя*) бәйләнеү, (үҙеңде) ҡуша бәйләп ҡуйыу **2.** *к кому-чему*; *перен.* (*почувствовать привязанность*) эйәләшеү, өйрәнеү, эҫенеп китеү; **привяза́ться к воспита́тельнице** тәрбиәсегә өйрәнеп китеү **3.** *к кому-чему*; *перен.*, *разг.* (*приставать, надоедая*) бәйләнеп китеү, теңкәгә тейеү, бәйләнеү, йөҙәтеү; **чего́ привяза́лись?** нимә бәйләндегеҙ?

**ПРИВЯЗНО́Й,** -ая, -ое бәйләп ҡуйылған (ҡуйыла торған), бәйле

**ПРИВЯ́ЗЧИВОСТЬ** *ж* **1.** мауығыусанлыҡ, эйәләшеүсәнлек **2.** (*надоедливость*) бәйләнсеклек, йөҙәткеслек, теңкәгә тейеү, теңкә ҡоротоу

**ПРИВЯ́ЗЧИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** тиҙ бирелә (мауыға, эйәләшә) торған **2.** (*надоедливый*) бәйләнсек, һырышҡаҡ **3.** (*придирчивый*) бәйләнсек

**ПРИВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **привяза́ть** 1

**ПРИВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **привяза́ться** **2.** *страд. от* **привя́зывать** 1

**ПРИ́ВЯЗЬ** *ж* бәй, еле, бау, сылбыр (*һыйырҙарҙы бәйләп тотоу өсөн*); **натя́гивать при́вязь** еле һуҙыу; **соба́ка на при́вязи** бәйҙәге эт

**ПРИГА́Р** *м*; *разг.* көйөк, көйгән ер (урын)

**ПРИГВОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **пригвозди́ть**

**ПРИГВОЗДИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡаҙаҡлау, ҡаҙаҡлап ҡуйыу, сәнсеү; **пригвозди́ть штыко́м** штык менән сәнсеү **2.** *перен.* ҡуҙғала алмау, ҡуҙғала алмаҫлыҡ хәлгә килтереү; **он пригвождён боле́знью к посте́ли** ул ҡуҙғала ла алмай ауырып ята ♦ **пригвозди́ть к позо́рному столбу́** яманатын асыу, хур итеү, хурлыҡ бағанаһына бәйләү

**ПРИГИБА́ТЬ** *несов. см.* **пригну́ть**

**ПРИГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пригну́ться** **2.** *страд. от* **пригиба́ть**

**ПРИГЛА́ДИТЬ** *сов. что* **1.** һыйпау, һыйпап шымартыу (ҡуйыу); **пригла́дить во́лосы** сәсте һыйпау, сәсте һыйпап ҡуйыу **2.** *перен.*, *разг.* шымартыу; **пригла́дить стиль статьи́** мәҡәләнең стилен шымартыу

**ПРИГЛА́ДИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һыйпаныу, тигеҙләнеп ятыу

**ПРИГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **пригла́дить**

**ПРИГЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пригла́диться 2.** *страд. от* **пригла́живать**

**ПРИГЛАСИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое саҡырыу ...ы, саҡырған; **пригласи́тельный биле́т** саҡырыу билеты

**ПРИГЛАСИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** саҡырыу, саҡырып алыу; **пригласи́ть госте́й** ҡунаҡ саҡырыу; **приглаша́ть на обе́д** ашҡа саҡырып алыу **2.** тәҡдим итеү; **пригласи́ть сесть** ултырырға тәҡдим итеү

**ПРИГЛАША́ТЬ** *несов. см.* **пригласи́ть**

**ПРИГЛАША́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **приглаша́ть**

**ПРИГЛАШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **пригласи́ть — приглаша́ть**; **приглаше́ние на сва́дьбу** туйға саҡырыу **2.** саҡырыу ҡағыҙы (хаты); **разосла́ть приглаше́ния** саҡырыу ҡағыҙҙары ебәреү

**ПРИГЛАШЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **пригласи́ть 2.** *прил.* саҡырылған; **приглашённый ле́ктор** саҡырылған лектор **3.** *в знач. сущ.* **приглашённый** *м* и **приглашённая** *ж* саҡырылған кеше, саҡырыу буйынса килеүсе кеше, ҡунаҡ; **приглашённые се́ли за стол** ҡунаҡтар өҫтәл артына ултырҙылар

**ПРИГЛУША́ТЬ** *несов. см.* **приглуши́ть**

**ПРИГЛУШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** баҫа биреү (төшөү), кәметеү, аҙайтыу; **приглуши́ть звук** тауышты баҫа төшөү **2.** *перен.*, *разг.* (*ослабить какое-л. чувство, ощущение*) баҫыу (*мәҫ., тойғоно, ауыртыуҙы*)

**ПРИГЛЯДЕ́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **присмотре́ть**

**ПРИГЛЯДЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **присмотре́ться**

**ПРИГЛЯ́ДЫВАТЬ** *несов.*; *разг. см.* **пригляде́ть**

**ПРИГЛЯ́ДЫВАТЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **пригляде́ться**

**ПРИГЛЯНУ́ТЬСЯ** *сов. кому*; *разг.* күңелгә оҡшау, күңелгә ярау, күҙ төшөү; **ему́ приглянула́сь одна́ де́вушка** уның бер ҡыҙға күҙе төшкән

**ПРИГНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡыуып алып килеү (ҡайтыу), ҡыуып килтереү, килтереү; **пригна́ть ста́до** көтөүҙе ҡыуып алып килеү **2.** *что* алып килеү, килтереп ҡуйыу, килтереү; **пригна́ть маши́ну в гара́ж** машинаны гаражға килтереп ҡуйыу **3.** *что*; *спец.* (*подогнать*) ашлау, иплəү, ашлап ҡуйыу (ултыртыу), йәпләп ҡуйыу; **пригна́ть дверь к косяку́** ишекте яңаҡтарына ашлап ултыртыу

**ПРИГНУ́ТЬ** *сов. кого-что* бөгә (эйелдерә) биреү, бөгөп ҡуйыу; **пригну́ть ве́тку к земле́** ботаҡты ергә табан бөгөп ҡуйыу

**ПРИГНУ́ТЬСЯ** *сов.* эйелеү, бөгөлөү, аҙыраҡ бөгөлөү

**ПРИГОВА́РИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **приговори́ть 2.** *что* (*сопровождать словами какое-л. действие*) әйтә-әйтә эшләү (барыу һ.б.), һөйләнә-һөйләнә эшләү (барыу һ.б.)

**ПРИГОВО́Р** *м* **1.** хөкөм, суд ҡарары, приговор; **оправда́тельный пригово́р** аҡлау хөкөмө; **выноси́ть пригово́р** хөкөм сығарыу (итеү) **2.** *перен.*, *уст.* (*мнение, суждение относительно кого-чего-л.*) ҡарар, хөкөм; **суро́вый пригово́р исто́рии** тарихтың ҡаты хөкөмө

**ПРИГОВОРИ́ТЬ** *сов. кого-что, к чему* хөкөм итеү, хөкөмгә тарттырыу, хөкөм сығарыу

**ПРИГОДИ́ТЬСЯ** *сов. кому-чему* ярау, ярап ҡалыу, кәрәге (кәрәк) булыу, файҙаға ярау (ашыу), файҙаһы тейеү; **сове́ты отца́ пригоди́лись** атайҙың кәңәштәре ярап ҡалды

**ПРИГО́ДНОСТЬ** *ж* яраҡлылыҡ, кәрәге (кәрәк) булыу, файҙалы булыу

**ПРИГО́ДНЫЙ,** -ая, -ое яраҡлы, ярарлыҡ, кәрәкле; **быть приго́дным к де́лу** эшкә яраҡлы булыу; **сде́лать приго́дным** ярарлыҡ итеү

**ПРИГО́ЖИЙ,** -ая, -ее **1.** *трад.-поэт.* (*красивый — о человеке*) матур, һөйкөмлө, сибәр **2.** *разг.* (*ясный, солнечный — о погоде*) аяҙ, ҡояшлы, сыуаҡ

**ПРИГОЛУ́БИТЬ** *сов. кого*; *разг.*, *трад.-поэт.* һөйөү, иркәләү, күңелен күреү

**ПРИГО́Н** *м см.* **пригна́ть — пригоня́ть** 1, 2

**ПРИГО́НКА** *ж см.* **пригна́ть — пригоня́ть**

**ПРИГОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **пригна́ть**

**ПРИГОРА́ТЬ** *несов. см.* **пригоре́ть**

**ПРИГОРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое көйөк тәме ингән; (*о печёном, жареном*) көйгән; (*о молоке, супе*) күмһегән

**ПРИГОРЕ́ТЬ** *сов.* (*о хлебе и т.п.*) көйөү; (*о молоке*) күмһеү; **пиро́г пригоре́л** бәлеш көйгән; **молоко́ пригоре́ло** һөт күмһегән

**ПРИ́ГОРОД** *м* ҡала яны, ҡала тирәһе, биҫтә

**ПРИ́ГОРОДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡала тирәһендәге (янындағы); **при́городное хозя́йство** ҡала тирәһендәге хужалыҡ **2.** (*о транспорте*) ҡала-тирә ...ы; **при́городный авто́бус** ҡала-тирә автобусы

**ПРИГО́РОК** *м* түбәләс, түбә, ҡалҡыулыҡ; **подня́ться на приго́рок** түбәләскә менеү

**ПРИ́ГОРШНЯ** и **ПРИГО́РШНЯ** *ж* **1.** алаҡан, ус, ҡуш ус; **подста́вить приго́ршни** ус ҡуйыу **2.** бер ус; **при́горшня я́год** бер ус еләк ♦ **по́лными при́горшнями (сы́пать, дава́ть и т.п.)** ҡуш услап, күп итеп (һибеү, биреү һ.б.)

**ПРИГОРЮ́НИВАТЬСЯ** *несов. см.* **пригорю́ниться**

**ПРИГОРЮ́НИТЬСЯ** *сов.*; *разг.*, *трад.-поэт.* ҡайғыға ҡалыу (батыу, сумыу), моңайыу бойоғоу, бойоғоп (моңайып) китеү

**ПРИГОТА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **пригото́вить**

**ПРИГОТА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пригото́виться 2.** *страд. от* **пригота́вливать**

**ПРИГОТОВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **подготови́тельный**

**ПРИГОТО́ВИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* әҙерләү, әҙерләп ҡуйыу, хәстәрләү; **пригото́вить маши́ну к пое́здке** машинаны юлға әҙерләп ҡуйыу; **пригото́вить дрова́** утын хәстәрләү **2.** *что, чего* (*заранее*) алдан әҙерләү, өлгөртөү, әҙерләп ҡуйыу; **пригото́вить ба́ню** мунса өлгөртөү **3.** *что* әҙерләү, бешереү, өлгөртөү; **пригото́вить сала́т** салат әҙерләү; **пригото́вить обе́д** аш өлгөртөү

**ПРИГОТО́ВИТЬСЯ** *сов. к чему, с неопр.* и *без доп.* әҙерләнеү, әҙерләнеп ҡуйыу, әҙер булыу; **пригото́виться зара́нее** алдан әҙерләнеп ҡуйыу; **пригото́виться к заня́тиям** дәрестәргә әҙерләнеү

**ПРИГОТОВЛЕ́НИЕ** *с см.* **пригото́вить — приготовля́ть, пригото́виться — приготовля́ться**

**ПРИГОТОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **пригото́вить**

**ПРИГОТОВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пригото́виться 2.** *страд. от* **приготовля́ть**

**ПРИГРАНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое сиккә яҡын, сик буйындағы

**ПРИГРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **пригре́ть**

**ПРИГРЕ́ЗИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*представиться в воображении*) күҙ алдына килеп баҫыу, күҙ алдына баҫыу (килеү), кәүҙәләнеү, һүрәтләнеү **2.** (*присниться*) төшкә инеү

**ПРИГРЕСТИ́** *сов.*; *разг.* **1.** *что* (*сгребая, собрать*) көрәү, йыйыу, көрәп (йыйыу) өйөү, көрәп өйөп ҡуйыу; **пригрести́ снег к забо́ру** ҡарҙы ҡойма эргәһенә көрәп өйөп ҡуйыу **2.** (*приблизиться, гребя вёслами*) ишеү, ишеп килеү, ишеп килтереү, ишеп килеп туҡтау; **пригрести́ к бе́регу** ишеп килеп яр буйына туҡтау

**ПРИГРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* йылытыу, йылыта төшөү; **со́лнце пригре́ло** ҡояш йылыта төштө **2.** *кого*; *перен., разг.* ярҙам, хәстәр күрһәтеп яҡынайтыу, һыйындырыу; **пригре́ть у себя́ сиро́т** етемдәрҙе үҙеңә һыйындырыу

**ПРИГРЕ́ТЬСЯ** *сов.* йылыныу; **пригре́ться на со́лнышке** ҡояшта йылыныу

**ПРИГРОЗИ́ТЬ** *сов. кому, чем* ҡурҡытыу, янау, ҡурҡытыу ишараһы яһау

**ПРИГУ́БИТЬ** *сов. что, чего* и *без доп.* ирен тейҙереү, татып (тәмләп) ҡарау

**ПРИДАВА́ТЬ** *несов. см.* **прида́ть**; **не придава́йте э́тому значе́ния** быға ҙур әһәмиәт бирмәгеҙ

**ПРИДАВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*прижать*) баҫтырыу, баҫтырып ҡуйыу, батыра баҫыу, һеңдерә баҫыу; **придави́ть к земле́** ергә батыра баҫыу; **придави́ть ка́мнем** таш менән баҫтырып ҡуйыу **2.** *кого*; *перен., прост.* ҡыҫыу, баҫыу, иҙеү (*рухи яҡтан*) **3.** *разг.* (*задавить*) баҫып үлтереү, һытыу

**ПРИДА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **придави́ть**

**ПРИДА́ВЛЕННОСТЬ** *ж*; *разг.* йәберһетелгәнлек

**ПРИДА́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **придави́ть 2.** *прил.*; *разг.* (*низкий, придавленный*) тәпәш, йәйпәк **3.** *прил.*; *разг.* (*забитый*) түбәнһетелгән, йәберһетелгән

**ПРИДА́НОЕ** *с* **1.** игәт, бирнә **2.** (*для новорождённого*) бала бүләге

**ПРИДА́ТОК** *м* **1.** ҡушымта, тағылма; **быть в ро́ли прида́тка** ҡушымта ролендә булыу **2.** *спец.* өҫтәмә ағзалар, өҫтә(л)мә үҫенте; **прида́ток яи́чника** түллек өҫтәмәһе

**ПРИДА́ТОЧНЫЙ,** -ая, ое эйәрсән, өҫтәмә; **прида́точная по́чка** *бот.* өҫтәмә бөрө; **прида́точное тре́бование** *юр.* эйәрсән талап ♦ **прида́точное предложе́ние** *грам.* эйәрсән һөйләм

**ПРИДА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*прибавить*) өҫтәп биреү, өҫтәү; **прида́ть в по́мощь люде́й** ярҙамға кешеләр өҫтәү **2.** *чего* (*усилить, прибавить что-л.*) (көс, дәрт) биреү, өҫтәү **3.** *что* (*дать свойство*) биреү (*бирәй ұҙенсәлек, сифат*); **прида́ть усто́йчивость** ныҡлыҡ биреү **4.** *что*; *перен.* (*вложить во что-л. какой-л. смысл*) әһәмиәт биреү; **прида́ть серьёзное значе́ние слова́м** һүҙгә етди әһәмиәт биреү

**ПРИДА́ЧА** *ж* **1.** *см.* **прида́ть — придава́ть** 1, 2; **2.** (*то, что придано, прибавлено сверх чего-л.*) өҫтәмә, өҫтәү; **проси́ть прида́чу** өҫтәү һорау ♦ **в прида́чу** өҫтәүгенә, өҫтәлмә рәүештә

**ПРИДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **придви́нуть**

**ПРИДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **придви́нуться 2.** *страд. от* **придвига́ть**

**ПРИДВИЖНО́Й,** -ая, -ое күсермәле, күсереләрлә торған; **придвижно́й сто́лик** күсермәле өҫтәл

**ПРИДВИ́НУТЬ** *сов. что* **1.** (*двигая, приблизить*) яҡынайтыу, яҡын килтереү, эргәгә тартыу; **придви́нуть стол к стене́** өҫтәлде стенаға яҡын тартыу **2.** *разг.* (*сделать более близким по времени*) ваҡыт араһын кәметеү, яҡынайтыу, яҡын күсереү; **придви́нуть срок** ваҡытын яҡынайтыу

**ПРИДВИ́НУТЬСЯ** *сов.* яҡынлау, яҡынайыу, яҡын килеү

**ПРИДВО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** батша һарайындағы, һарай ...ы; **придво́рный поэ́т** батша һарайындағы шағир **2.** *в знач. сущ.* **придво́рный** *м* и **придво́рная** *ж* батшаға яҡын кеше, һарай кешеһе

**ПРИДЕ́ЛАТЬ** *сов. что, к чему* эшләп (яһап) ҡуйыу, беркетеү; **приде́лать замо́к к дверя́м** ишеккә бик эшләп ҡуйыу

**ПРИДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **приде́лать**

**ПРИДЕРЖА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что* (*задержать; слегка удерживая, не дать упасть и т.п.*) бер аҙ тота төшөү, туҡтатып тороу, тотоңҡорау; **придержа́ть ло́шадь** атты туҡтатып тороу **2.** *что*; *перен.* (*не пустить в оборот*) тотоп (һаҡлап) тороу ♦ **придержа́ть язы́к** *см.* **язы́к**

**ПРИДЕ́РЖИВАТЬ** *несов. см.* **придержа́ть**

**ПРИДЕ́РЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *за что* (*слегка держаться*) тотоноу, тотоңҡорау, тотоноп ба-

рыу (тороу); **приде́рживаться руко́й за ле́стницу** ҡул менән баҫҡысҡа тотоноу **2.** *чего* менән барыу, буйынса барыу, тотоу, -тан/-тән барыу; **приде́рживаться пра́вой стороны́** уң яҡтан барыу **3.** *чего* тороу, булыу, яҡлы булыу; **приде́рживаться осо́бого мне́ния** айырым фекерҙә булыу **4.** *страд. от* **приде́рживать**

**ПРИДИ́РА** *м* и *ж*; *разг.* бәйләнсек (әләксән) кеше

**ПРИДИРА́ТЬСЯ** *несов. см.* **придра́ться**

**ПРИДИ́РКА** *ж* бәйләнеү, соҡсоноу

**ПРИДИ́РЧИВОСТЬ** *ж* бәйләнсеклек, бәйләнеүсәнлек

**ПРИДИ́РЧИВЫЙ,** -ая, -ое бәйләнсек, бәйләнеүсән, әләксән; **приди́рчивый челове́к** бәйләнсек кеше

**ПРИДОРО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое юл буйындағы, юл янындағы (эргәһендәге)

**ПРИДРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** *к кому-чему* и *без доп.* бәйләнеү, ҡаныҡыу; **придра́ться к пустяку́** ваҡ-төйәккә бәйләнеү; **придра́ться к прохо́жим** үтеп барыусыларға бәйләнеү **2.** *к чему* (*использовать как предлог для чего-л.*) һылтаныу, һылтау итеп алыу, бәйләнеү

**ПРИДУ́МАТЬ** *сов. что* **1.** уйлап табыу (сығарыу), башҡа килеү; **приду́мать но́вое сре́дство** яңы сара уйлап сығарыу **2.** (*выдумать*) хыял (фараз) итеү, тип уйлау

**ПРИДУ́МЫВАТЬ** *несов. см.* **приду́мать**

**ПРИДУ́РИВАТЬСЯ** *несов.*; *прост.* алмашаланыу, алмаша булыу, белмәгән булып ҡыланыу

**ПРИДУРКОВА́ТОСТЬ** *ж*; *разг.* иҫәүәнлек, аҡылға һайлыҡ, тинтәклек

**ПРИДУРКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* иҫәүән, тинтәк, аҡылға бер төрлө

**ПРИДУ́РОК** *м*; *прост.* иҫәүән, аҡылға бер төрлө кеше

**ПРИ́ДУРЬ** *ж*; *разг.* иҫәр холоҡ, насар холоҡ; **с при́дурью** иҫәр, аҡылға һай, тиле (*кеше тураһында*)

**ПРИДУШИ́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* быуып үлтереү, тонсоҡтороп үлтереү

**ПРИДЫХА́НИЕ** *с* еңелсә һулыш; **произноси́ть с придыха́нием** еңелсә һулыш менән әйтеү

**ПРИДЫХА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* еңелсә һулышлы, ышҡылыулы (*тартынҡы өндәргә ҡарата*)

**ПРИЕДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **прие́сться**

**ПРИЕ́ЗД** *м см.* **приезжа́ть**; **прие́зд в го́род** ҡалаға килеү; **с прие́здом!** килеүегеҙ менән!, хуш килдегеҙ!

**ПРИЕЗЖА́ТЬ** *несов. см.* **прие́хать**

**ПРИЕЗЖА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **приезжа́ть 2.** *в знач. сущ.* **приезжа́ющий** *м* и **приезжа́ющая** *ж* үткенсе, юлаусы, мосафир

**ПРИЕ́ЗЖИЙ,** -ая, -ее **1.** ситтән килеүсе, ситтән килгән; **прие́зжие арти́сты** ситтән килгән артистар **2.** *в знач. сущ.* **прие́зжий** *м* и **прие́зжая** *ж* (ситтән) килгән кеше, ситтән килеүсе

**ПРИЁМ** *м* **1.** *см.* **приня́ть** — **принима́ть** 1, 2, 4, 6; **приём в институ́т** институтҡа ҡабул итеү; **приём на рабо́ту** эшкә алыу; **часы́ приёма** ҡабул итеү сәғәттәре; **приём врача́** табиптың ҡабул итеү сәғәттәре **2.** ҡабул итеү (мәжлесе); **устро́ить приём** ҡабул итеүҙе ойоштороу; **официа́льный приём** рәсми ҡабул итеү **3.** (*характер встречи*) ҡаршылау, ҡаршы алыу; **оказа́ть тёплый приём** йылы ҡаршылау **4.** (*в сочетании с числительным "один"*) йотом, бүлем, юл, алым; **сде́лать всё в оди́н приём** бөтәһен бер юлы эшләп ҡуйыу **5.** (*способ осуществления чего-л.*) ысул, алым; **агротехни́ческие приёмы** агротехник алымдар; **приём борьбы́** көрәш ысулы; **литерату́рный приём** әҙәби алым

**ПРИЕ́МЛЕМОСТЬ** *ж*; *книжн.* ҡабул итерлек булыу, яраҡлылыҡ

**ПРИЕ́МЛЕМЫЙ,** -ая, -ое яраҡлы, лайыҡ, мәғҡул, ҡабул ите(ле)рлек; **счита́ть прие́млемым** мәғҡул күреү; **вполне́ прие́млемое предложе́ние** ҡабул итерлек тәҡдим

**ПРИЁМНИК** *м* **1.** (*радиоприёмник*) алғыс, радиоалғыс (*сигнал ала торған аппарат*); **включи́ть приёмник** радиоалғысты асыу **2.** (*устройство для собирания чего-л.*) йыйғыс (соҡор), ҡабул иткес; **в приёмник полила́сь вода́** йыйғыс соҡорға һыу аға башланы **3.** (*учреждение*) приёмник; **де́тский приёмник** балалар приёмнигы

**ПРИЁМНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡабул итеү, алыу ...ы, алғыс; **приёмный день** ҡабул итеү көнө; **приёмные экза́мены** ҡабул итеү имтихандары; **приёмная анте́нна** *тех.* алғыс антенна **2.** *в знач. сущ.* **приёмная** *ж* ҡабул итеү бүлмәһе; **приёмная в больни́це** хәстәханала ҡабул итеү бүлмәһе **3.** (*о детях*) аҫрауға (тәрбиәгә) алынған; (*о родителях*) аҫрауға (бала) алған; **приёмный сын** аҫрауға алынған ул

**ПРИЁМОЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡабул итеү ...ы, алыу(сы); **приёмочный пункт** ҡабул итеү пункты

**ПРИЁМЩИК** *м* и **ПРИЁМЩИЦА** *ж* ҡабул итеүсе, ҡабул итеп тороусы

**ПРИЁМЫШ** *м*; *разг.* аҫрау, аҫрауға (аҫрарға) алған бала

**ПРИЕ́СТЬСЯ** *сов.*; *разг.* екһеү, екһетеү, екһенеү, екһендереү, ялҡытыу; **лапша́ мне прие́лась** туҡмастан екһендем; **мне э́то прие́лось** был мине ялҡытты инде

**ПРИЕ́ХАТЬ** *сов.* (ултырып) килеү, менән килеү, ҡайтыу; **прие́хать домо́й** өйгә ҡайтыу; **прие́хать авто́бусом** автобус менән килеү

**ПРИЖА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*придавить*) ҡыҫыу, баҫтырыу; **прижа́ть ка́мнем** таш менән баҫтырыу; **прижа́ть ру́ку к груди́** ҡулды күкрәккә ҡыҫыу **2.** *перен.*, *разг.* (*притеснить*) ҡыҫыу, йәберләү, иҙеү ♦ **прижа́ть в у́гол** *см.* **у́гол**

**ПРИЖА́ТЬСЯ** *сов. к кому-чему* һырыныу, һырышыу, һыйыныу; **прижа́ться к земле́** ергә һырышыу; **прижа́ться к ма́тери** әсәгә һырыныу

**ПРИЖЕ́ЧЬ** *сов. что* өтөү, көйҙөрөү, һөртөү, зәһәр нәмә баҫыу; **приже́чь ра́ну йо́дом** яраны йод менән өтөү

**ПРИЖИВА́ЕМОСТЬ** *ж*; *спец.* үҙләшеү, ерләшеү

**ПРИЖИВА́ТЬ** *несов. см.* **прижи́ть**

**ПРИЖИВА́Л** *м* и **ПРИЖИВА́ЛКА** *ж*; *разг., уст. см.* **прижива́льщик**

**ПРИЖИВА́ЛЬЩИК** *м* и *уст.* **ПРИЖИВА́ЛЬЩИЦА** *ж* әрәмтамаҡ (*кеше елкәһендә йәшәүсе*)

**ПРИЖИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прижи́ться** **2.** *страд. от* **прижива́ть**

**ПРИЖИВИ́ТЬ** *сов. что* ялғап (йәбештереп) үҫтереү; **приживи́ть ткань** туҡыма ялғап үҫтереү

**ПРИЖИВИ́ТЬСЯ** *сов.* ялғаныып үҫеү

**ПРИЖИВЛЕ́НИЕ** *с*; *спец. см.* **приживи́ть** — **приживля́ть**, **приживи́ться** — **приживля́ться**

**ПРИЖИВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **приживи́ть**

**ПРИЖИВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приживи́ться** **2.** *страд. от* **приживля́ть**

**ПРИЖИГА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **прижига́ть** **2.** көйҙөрөп дауалау ысулы

**ПРИЖИГА́ТЬ** *несов. см.* **приже́чь**

**ПРИЖИ́ЗНЕННЫЙ,** -ая, -ое (*происшедший ещё при чьей-л. жизни*) үҙе иҫән сағында (саҡта), үлмәҫ борон -ған/-гән; **прижи́зненное изда́ние сочине́ний Валиди́** Вәлидиҙең үҙе иҫән сағында сыҡҡан әҫәрҙәре

**ПРИЖИМА́ТЬ** *несов. см.* **прижа́ть**

**ПРИЖИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прижа́ться** **2.** *страд. от* **прижима́ть**

**ПРИЖИ́МИСТОСТЬ** *ж*; *разг.* һаранлыҡ, ҡормошлоҡ, ҡатылыҡ

**ПРИЖИ́МИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* һаран, ҡомһоҙ, ҡормош, ҡаты (*иҫәпләшеүҙә*); **прижи́мистый челове́к** һаран кеше

**ПРИЖИ́ТЬ:** **прижи́ть ребёнка** уйнаштан (йөрөп) бала табыу, ситтән бала табыу

**ПРИЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*привыкнуть*) эйәләшеү, эйәләү, үҙләшеү; **где му́ха, там и кома́р приживётся** себенле ергә серәкәй эйәләр **2.** (*акклиматизироваться — о растениях*) ерләшеү, ерһенеү, үҫеп китеү

**ПРИЗ** *м* бүләк, приз; **получи́ть пе́рвый приз** беренсе призды алыу

**ПРИЗАДУ́МАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (бер аҙ) уйға ҡалыу, әҙерәк уйланыу, уйға төшөү; **она́ призаду́малась** ул уйға ҡалды

**ПРИЗАДУ́МЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **призаду́маться**

**ПРИЗАНЯ́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* бер аҙ үтескә (көтөргә) алыу (алып тороу) (*аҙ ғына ваҡытҡа*)

**ПРИЗВА́НИЕ** *с* **1.** *уст. см.* **призва́ть** 1, 3; **2.** (*склонность к чему-л.*) һәләтлелек, булмыш, күңел тартыу; **худо́жник по призва́нию** булмышы менән рәссам; **призва́ние к иску́сству** сәнғәткә һәләтлелек **3.** (*предназначение*) бурыс, вазифа; **высо́кое призва́ние** юғары бурыс

**ПРИЗВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** саҡырыу, саҡырып алыу; **призва́ть к поря́дку** тәртипкә саҡырыу **2.** (*привлечь к важному делу*) саҡырыу, өндәү; **призва́ть к борьбе́** көрәшкә өндәү **3.** (*на военную службу*) алыу; **призва́ть в а́рмию** әрмегә алыу

**ПРИЗЕ́МИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*малорослый*) тәбәнәк, төптән йыуан, төпөш; **призе́мистый челове́к** тәбәнәк кеше **2.** (*низкий — о предмете*) лапаҡ, тәпәш; **призе́мистый дом** лапаҡ өй

**ПРИЗЕМЛЕ́НИЕ** *с см.* **приземли́ть** — **приземля́ть**, **приземли́ться** — **приземля́ться**

**ПРИЗЕМЛИ́ТЬ** *сов. что*; *ав.* (ергә) төшөрөү, (ергә) ултырыу; **приземли́ть самолёт** самолётты ергә ултыртыу

**ПРИЗЕМЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *ав.* (ергә) ултырыу, (ергә) төшөү; **вертолёт благополу́чно приземли́лся** вертолёт ергә имен төштө

**ПРИЗЕМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **приземли́ть**

**ПРИЗЕМЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приземли́ться** **2.** *страд. от* **приземля́ть**

**ПРИЗЁР** *м* и *разг.* **ПРИЗЁРША** *ж*; *спорт.* приз алыусы, бүләкләнеүсе

**ПРИ́ЗМА** *ж*; *мат., физ.* призма (*ҡырлы есем*); **зерка́льная при́зма** көҙгөлө призма; **пра́вильная при́зма** дөрөҫ призма ♦ **смотре́ть сквозь при́зму** *чего* үҙ күҙлеге аша ҡарау, тәьҫиренән сығып эш итеү

**ПРИЗМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *мат., физ.* призматик, призма формаһындағы, призма аша алынған; **призмати́ческая пове́рхность** призматик йөҙ; **призмати́ческий спектр** призма аша алынған спектр **2.** (*о приборах*) призмалы; **призмати́ческий бино́кль** призмалы бинокль

**ПРИЗНАВА́ТЬ** *несов. см.* **призна́ть**

**ПРИЗНАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **призна́ться** **2.** *в 1 л. ед. ч. наст. вр.* **признаю́сь** *в знач. вводн. сл.* дөрөҫөн әйткәндә, асыҡтан-асыҡ әйткәндә; **признаю́сь, я не знал об э́том** дөрөҫөн әйткәндә, мин был турала белмәнем **3.** *страд. от* **признава́ть**

**ПРИ́ЗНАК** *м* билге, билдә, ишарат; **видовы́е при́знаки** *биол.* төр билдәләре; **при́знаки дели́мости чи́сел** *мат.* һандарҙың бүленеүсәнлек билдәләре

**ПРИЗНА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **призна́ть** 1, 2, **призна́ться** 1, 2; **2.** (*слова признающегося в чём-л.*) таныу, әйтеп биреү, асылыу, асып һалыу; **призна́ние подсуди́мого** *юр.* ғәйепләнеүсенең үҙ ғәйебен таныуы; **вы́слушать призна́ние** *чьё-л.* *кемдеңдер* асылыуын тыңлау **3.** (*общественное уважение*) танылыу, абруй ҡаҙаныу ♦ **призна́ние в любви́** мөхәббәт белдереү

**ПРИ́ЗНАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **призна́ть 2.** *прил.* танылған; **при́знанный учёный** танылған ғалим

**ПРИЗНА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ҡәҙерен белеү, рәхмәт (әйтеү, белдереү); **в знак призна́тельности** рәхмәт йөҙөнән

**ПРИЗНА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое рәхмәт белдергән, ҡәнәғәт, рәхмәтле; **призна́тельный взгляд** рәхмәт белдергән ҡараш; **о́чень призна́телен** *разг.* (һеҙгә) ҙур рәхмәт

**ПРИЗНА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* таныу, иҡрар итеү (ҡылыу); **призна́ть но́вое госуда́рство** яңы дәүләтте таныу; **призна́ть права́** хоҡуғын таныу; **призна́ть свою́ оши́бку** үҙ хатаңды иҡрар итеү **2.** *кого-что* таныу, тип табыу, иҫәпләү, тартыу; **призна́ть рабо́ту зако́нченной** эште тамамланған тип табыу **3.** *кого-что*; *прост.* (*узнать*) таныу; **призна́ть его́ по го́лосу** уны тауышынан таныу

**ПРИЗНА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *в чём* таныу, иҡрар итеү, тип табыу; **подсуди́мые призна́лись** *юр.* ғәйепләнеүселәр үҙ ғәйептәрен иҡрар итте; **призна́ться в свои́х оши́бках** үҙ хатаңды таныу **2.** әйтеп (һөйләп) биреү, сисеп һалыу; **призна́ться в любви́** үҙенең һөйөүен әйтеп биреү, мөхәббәт белдереү **3.** *неопр.* **призна́ться** и *в 1 л. ед. ч. буд. вр.* **призна́юсь** *в знач. вводн. сл.* дөрөҫөн (асыҡтан-асыҡ) әйткәндә; **призна́ться, э́то мне непоня́тно** асыҡтан-асыҡ әйткәндә, миңә был аңлашылмай

**ПРИЗОВО́Й,** -ая, -ое призлы, бүләкле, бүләк ...ы; **призово́е ме́сто** бүләкле урын; **призово́й фонд** бүләк фонды

**ПРИЗО́Р** *м*; *уст.*, *разг.* (*обычно в род. п.* и *с предлогом "без"*) ҡарауһыҙ, күҙәтеүһеҙ, бағыуһыҙ; **де́ти без призо́ра** ҡарауһыҙ балалар

**ПРИ́ЗРАК** *м* **1.** шәүлә, кәүҙәләнеш, (һынланып) күҙгә күренеү; **при́зраки про́шлого** үткәндең шәүләһе **2.** (*привидение*) өрәк

**ПРИ́ЗРАЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*воображаемый*) хыялда ғына булған, хыялдағы; **при́зрачные наде́жды** хыялдағы өмөттәр **2.** (*неясный*) томанлы, тоноҡ, күренер-күренмәҫ; **при́зрачный свет** күренер-күренмәҫ яҡтылыҡ шәүләһе **3.** өрәк, күҙгә генә күренгән; **при́зрачное виде́ние** өрәк күренеү

**ПРИЗРЕ́НИЕ** *с см.* **призре́ть**; **оста́ться без призре́ния** ҡарауһыҙ ҡалыу

**ПРИЗРЕ́ТЬ** *сов. кого*; *уст.* тәрбиәгә алыу, бағыу, ҡарау; **призре́ть сироту́** етемде тәрбиәгә алыу

**ПРИЗЫ́В** *м* **1.** *см.* **призва́ть — призыва́ть**; **призы́в в а́рмию** армияға алыу; **призы́в к моли́тве** *рел.* аҙан әйтеү **2.** (*просьба*, *мольба*) ялбарыу, һорау, үтенеү; **призы́в о по́мощи** ярҙам һорау **3.** (*лозунг*) саҡырыу, оран, өндәү; **призы́в па́ртии** партия өндәүе **4.** *собир.*; *воен.* (*призванные*) призыв, хәрби хеҙмәткә алынғандар; **ве́сенний призы́в** яҙын хәрби хеҙмәткә алынғандар

**ПРИЗЫВА́ТЬ** *несов. см.* **призва́ть**

**ПРИЗЫВНИ́К** *м*; *воен.* призывник, саҡыраҡ (*ғәскәри хеҙмәткә саҡырылыусы кеше*)

**ПРИЗЫВНО́Й,** -ая, -ое саҡырыу ...ы, призыв ...ы, хәрби хеҙмәткә алыу ...ы; **призывно́й пункт** призыв пункты; **призывна́я коми́ссия** саҡырыу комиссияһы

**ПРИЗЫ́ВНЫЙ,** -ая, -ое саҡырыу ...ы, ялбарыу ...ы, үтенеү; **призы́вное сло́во** өндәү һүҙе

**ПРИ́ИСК** *м* прииск (*алтын һ.б. ҡаҙылдыҡтар сығарыла торған урын*); **золоты́е при́иски** алтын приискылары

**ПРИИСКА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* эҙләп табыу, табып алыу; **приiска́ть себе́ кварти́ру** үҙеңә фатир эҙләп табыу

**ПРИИ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **прииска́ть**

**ПРИИСКО́ВЫЙ,** -ая, -ое прииск ...ы; **приисќовая конто́ра** прииск контораһы

**ПРИЙТИ́** *сов.* **1.** килеү, килеп етеү, ҡайтыу; **прийти́ в шко́лу** мәктәпкә килеү; **прийти́ на рабо́ту** эшкә килеү; **прийти́ домо́й** өйгә ҡайтыу **2.** (*настать*) килеү, килеп етеү; **пришла́ о́сень** көҙ килде **3.** *к чему* килеү; **прийти́ к заключе́нию** һығымтаға килеү; **прийти́ к пра́вильному реше́нию** дөрөҫ ҡарарға килеү **4.** (*с предлогом "в"*) китеү, килеү, -ыу/-еү; **прийти́ в движе́ние** хәрәкәткә килеү; **прийти́ в у́жас** ҡурҡып китеү; **прийти́ в волне́ние** тулҡынланып китеү; **прийти́ в восто́рг** ныҡ шатланып китеү; **прийти́ в упа́док** емерелеү, тарҡалыу ♦ **прийти́ в го́лову** башҡа килеү; **прийти́ в себя́**: 1) аңға килеү, иҫкә килеү; 2) тынысланыу; **прийти́ на па́мять** *см.* **па́мять**; **прийти́ к ша́почному разбо́ру** *см.* **ша́почный**; **прийти́ на ум** *см.* **ум**

**ПРИЙТИ́СЬ** *сов.* **1.** (*совпасть с чем-л.*) тура килеү, эләгеү; **тре́тье число́ пришло́сь на вто́рник** өсө шишәмбегә тура килде **2.** *разг.* (*подойти*) таман булыу, ярау; **ша́пка пришла́сь ей по голове́** бүрек уның башына яраны **3.** *кому безл.* (*довестись*) булыу, тура килеү; **нам пришло́сь нелегко́** беҙгә еңел булманы **4.** *с неопр. безл.* тура килеү, кәрәк булыу; **прихо́дится согласи́ться** килешергә тура килә **5.** *прост.* (*стать в какую-л. цену*) ҡиммәткә төшөү **6.** *в 3 л. ед. ч. буд. вр.* **придётся** тура килә; **как придётся** нисек тура килә; **когда́ придётся** ҡасан тура килә ♦ **прийти́сь по вку́су (по́ сердцу, по нра́ву, по душе́)** оҡшау

**ПРИКА́З** *м* **1.** бойороҡ, приказ; **боево́й прика́з** хәрби приказ; **отда́ть прика́з** бойороҡ биреү **2.** *ист.* приказ (*Мәскәү дәүләте заманында идара эшенең айырым тармағын алып барыусы учреждение*)

**ПРИКАЗА́НИЕ** *с* бойороу, ҡушыу

**ПРИКАЗА́ТЬ** *сов. кому* и *с неопр.* бойороу, ҡушыу, һүҙ ҡушыу, бойороҡ биреү; **приказа́ть нача́ть наступле́ние** һөжүмде башларға бойороу ♦ **приказа́ть до́лго жить** вафат булыу, гүр әйәһе булыу

**ПРИКА́ЗЧИК** *м*; *ист.* **1.** (*наёмный служащий, продавец*) һатыусы **2.** (*управляющий имением*) приказчик

**ПРИКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **приказа́ть**

**ПРИКА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **приколо́ть**

**ПРИКА́ЛЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **прика́лывать**

**ПРИКА́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **прико́нчить**

**ПРИКАРМА́НИВАТЬ** *несов. см.* **прикарма́нить**

**ПРИКАРМА́НИТЬ** *сов. что*; *прост.* үҙләштереү, урлау, сәлдереү

**ПРИКА́РМЛИВАНИЕ** *с см.* **прика́рмливать**

**ПРИКА́РМЛИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **прикорми́ть 2.** *кого*; *разг.* (өҫтәмә рәүештә) ашатыу; **прика́рмливать ребёнка ка́шей** балаға өҫтәмә рәүештә бутҡа ашатыу

**ПРИКАСА́ТЬСЯ** *несов. см.* **прикосну́ться**

**ПРИКАСПИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Каспий буйы ...ы; **Прикаспи́йская ни́зменность** Каспий буйы уйһыулығы

**ПРИКАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*катя, доставить*) тәгәр(л)әтеп килтереү, тәгәр(л)әтеп килтереп ҡуйыу; **прикати́ть бо́чку** мискәне тәгәрәтеп килтереү **2.** *разг.* (*приехать*) килеү, килеп туҡтау (төшөү)

**ПРИКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* тәгәр(л)әп килеү, тәгәр(л)әп килеп туҡтау

**ПРИКА́ТЫВАНИЕ** *с*; *спец.* катоклау, тигеҙләү; **прика́тывание по́чвы** *с.-х.* тупраҡ өҫтөн катоклау

**ПРИКА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **прикати́ть**

**ПРИКА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прикати́ться 2.** *страд. от* **прика́тывать** 1

**ПРИКИ́ДКА** *ж*; *разг. см.* **прики́нуть**

**ПРИКИ́ДЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **прики́нуться**

**ПРИКИ́НУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что, чего* (*прибавить*) өҫтәү, өҫтәп ебәреү, арттырыу **2.** *что* (*примерить*) кейеп (үлсәп) ҡарау; **прики́нуть костю́м** костюмды кейеп ҡарау **3.** *что* (*приблизительно взвесить*) үлсәү, бизмәнгә һалыу, үлсәп ҡарау; **прики́нуть на веса́х** үлсәүгә һалып үлсәп ҡарау **4.** *что* и *без доп.* (*рассчитать, сообразить*) самалау, самалап (иҫәпләп) алыу, уйлап (самалап, иҫәпләп) ҡарау; **прики́нуть расстоя́ние** араны самалап алыу; **прики́нуть в уме́** уйлап ҡарау

**ПРИКИ́НУТЬСЯ** *сов. кем-чем*; *разг.* (юрамал) ҡыланыу, һалышыу, булып күренеү; **прики́дываться незна́ющим** белмәмешкә һалышыу; **прики́нуться дру́гом** дуҫ булып ҡыланыу

**ПРИКИПА́ТЬ** *несов. см.* **прикипе́ть**

**ПРИКИПЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** ҡаҫмаҡланып йәбешеү, көйөп йәбешеү, көйөү **2.** *к кому-чему*; *перен., прост.* эйәләшеү, өйрәнеү, эҫенеү; **прикипе́ть душо́й** эҫенеү, кемгәлер ныҡ эйәләшеү

**ПРИКЛА́Д** *м* **1.** (*у огнестрельного оружия*) төйҙә, мылтыҡ түтәһе **2.** *портн.* аҫтарлыҡ, төймә (*тегенец өсөн кәрәк-яраҡ*)

**ПРИКЛАДНО́Й,** -ая, -ое практик, ғәмәли, ҡулланма; **прикладны́е нау́ки** ғәмәли фәндәр; **прикладна́я матема́тика** ғәмәли математика ♦ **прикладно́е иску́сство** биҙәү-ҡулланма сәнғәте

**ПРИКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **приложи́ть** 1

**ПРИКЛА́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приложи́ться 2.** *страд. от* **прикла́дывать**

**ПРИКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **прикле́ить**

**ПРИКЛЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прикле́иться 2.** *страд. от* **прикле́ивать**

**ПРИКЛЕ́ИТЬ** *сов. что* йәбештереү, елем менән беркетеү, елемләп ҡуйыу; **прикле́ить ма́рку** марканы йәбештереү

**ПРИКЛЕ́ИТЬСЯ** *сов.* йәбешеү (*йәбешеп ҡуша һылашыу*)

**ПРИКЛЕПА́ТЬ** *сов. что* нығытыу, сөйләү, сейнәү, сигәләү, беркетеү

**ПРИКЛЕПА́ТЬСЯ** *сов.* сигәләп беркетелеү

**ПРИКЛЁПКА** *ж* **1.** *см.* **приклепа́ть** — **приклёпывать 2.** (*то, что приклёпано*) сейнәп ҡуйылған нәмә (*киҫәк, өлөш һ.б.*)

**ПРИКЛЁПЫВАТЬ** *несов. см.* **приклепа́ть**

**ПРИКЛЁПЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приклепа́ться 2.** *страд. от* **приклёпывать**

**ПРИКЛОНИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* эйеү; **приклони́ть ве́тви де́рева к земле́** ағас ботаҡтарын ергә эйеү ♦ **не́где (не́куда) го́лову приклони́ть** һыйыныр урын юҡ, морон терәр (төртөр) урын юҡ

**ПРИКЛОНИ́ТЬСЯ** *сов.* эйелеү; **приклони́ться к земле́** ергә эйелеү

**ПРИКЛОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **приклони́ть**

**ПРИКЛОНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приклони́ться 2.** *страд. от* **приклоня́ть**

**ПРИКЛЮЧА́ТЬ** *несов. см.* **приключи́ть**

**ПРИКЛЮЧА́ТЬСЯ I** *несов. см.* **приключи́ться**

**ПРИКЛЮЧА́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **приключа́ть**

**ПРИКЛЮЧЕ́НИЕ** *с* **1.** (*происшествие*) (көтмәгәндә булған) хәл-ваҡиға, кисереш; **весёлое приключе́ние** күңелле хәл-ваҡиға **2.** (*похождение*) мажара, баштан үткәндәр; **доро́жные приключе́ния** юл мажаралары; **кни́га о приключе́ниях** мажаралар тураһында китап

**ПРИКЛЮЧЕ́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое мажаралы; **приключе́нческий рома́н** мажаралы роман

**ПРИКЛЮЧИ́ТЬ** *сов. что*; *тех.* ҡушыу, тоташтырыу, ялғау

**ПРИКЛЮЧИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* булыу, осрау, башҡа (бәлә) төшөү, баштан үтеү, килеп сығыу; **что с ва́ми приключи́лось?** башығыҙға ниндәй бәлә төштө?; **приключи́лась неприя́тность** күңелһеҙлек килеп сыҡты

**ПРИКОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*ковкой присоединить*) сүкеп беркетеү **2.** (*прикрепить цепями*) быҒаулау, сынйырлау **3.** *что*; *перен.* ҡаҙаҡлау, беркетеү, (үҙенә) тартыу (йәлеп итеү); **прикова́ть к себе́ внима́ние** иғтибарҙы үҙенә

тартыу ♦ **прикова́ть к посте́ли** түшәккә йығыу (*сир тураһында*)

**ПРИКОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** сүкеп беркетелеү **2.** *перен.* (*о внимании, взгляде и т.п.*) текәлеү, төбәлеү, йүнәлеү

**ПРИКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **прикова́ть**

**ПРИКО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прикова́ться 2.** *страд. от* **прико́вывать**

**ПРИКОВЫЛЯ́ТЬ** *сов.*; *разг.* тәнтерәкләп килеү, саҡ-саҡ һөйрәлеп барыу (килеү, ҡайтыу)

**ПРИКО́Л** *м* ҡаҙыҡ; **прико́л плота́** һал бәйләү өсөн ҡаҙыҡ ♦ **на прико́ле** бәйҙә (бәйле) тороу

**ПРИКОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **приколоти́ть**

**ПРИКОЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приколоти́ться 2.** *страд. от* **прикола́чивать**

**ПРИКО́ЛКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **приколо́ть** — **прика́лывать** 1; **2.** (*то, чем прикалывают что-л.*) ҡаҙауыс, сәс ҡыҫтырғыс; **прико́лка для воло́с** сәс ҡаҙауысы

**ПРИКОЛОТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* ҡаҙаулау, ҡаҙаҡлау, сөйләү, ҡаҙаҡлап ҡуйыу; **приколоти́ть до́ску** таҡтаны ҡаҙаҡлап ҡуйыу **2.** *прост.* (*побить*) бәргеләп (туҡмап) китеү (алыу)

**ПРИКОЛОТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡаҙаҡланыу

**ПРИКО́ЛОТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **приколо́ть 2.** *прил.* ҡаҙаулы

**ПРИКОЛО́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*прикрепить*) ҡаҙау, ҡаҙап ҡуйыу, тағыу; **приколо́ть цветы́ на грудь** түшкә сәскә ҡаҙау **2.** *кого*; *разг.* (*убить*) ҡаҙап үлтереү, сәнсеп үлтереү

**ПРИКОМАНДИРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* ваҡытлыса эшкә ебәреү, командировать итеү, ваҡытлыса беркетеү (*учреждение, гәскәри часть һ.б. ҡарамағына*)

**ПРИКО́НЧИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* (*израсходовать*) тамамлау, бөтөрөү; **прико́нчить все запа́сы** бөтә запастарҙы бөтөрөү **2.** *кого* (*добить*) үлтереү, бөтөрөү, дөмөктөрөү, юҡ итеү; **прико́нчить зве́ря** йәнлекте үлтереү

**ПРИКОПИ́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* туплау, йыйыу

**ПРИКО́ПКА** *ж*; *сад.* күмеп тороу, күмеү; **прико́пка се́янцев** үҫентеләрҙе күмеп тороу

**ПРИКО́РМ** *м* алдатҡыс; аҙыҡ (*малдар өсөн*); ем (*ҡош, балыҡ өсөн*); **прико́рм для ры́бы** балыҡ еме; **ста́вить прико́рм** алдатҡыс һалыу

**ПРИКОРМИ́ТЬ** *сов. кого* ем биреп (ашатып) эйәләштереү; **прикорми́ть голубе́й** күгәрсендәрҙе ашатып эйәләштереү

**ПРИКО́РМКА** *ж см.* **прико́рм**

**ПРИКОРНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*прислонившись, прилечь*) терәлеп (һөйәнеп) йоҡлау **2.** (*задремать*) әҙ генә йоҡлап алыу, ойоу, серем итеп алыу

**ПРИКОСНОВЕ́НИЕ** *с см.* **прикосну́ться**

**ПРИКОСНУ́ТЬСЯ** *сов. к кому-чему* ҡағылыу, тейеү, тейеп (ҡағылып) китеү; **не прикосну́ться к еде́** ашҡа ҡағылмау

**ПРИКРА́СИТЬ** *сов. что*; *разг.* арттырып (өҫтәп) һөйләү, матурлап (күпертеп) һөйләү

**ПРИКРА́СЫ** *мн.* (*ед.* **прикра́са** *ж*); *разг.* **1.** (*преувеличения*) матурлау, биҙәү, шымартыу **2.** (*то, что может украсить кого-что-л.*) биҙәк, биҙәүес, шымартыу

**ПРИКРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **прикра́сить**

**ПРИКРЕПИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, ое беркетеү ...ы, теркәү ...ы; **прикрепи́тельный тало́н** беркетеү талоны

**ПРИКРЕПИ́ТЬ** *сов. кого-что, к кому-чему* **1.** беркетеү, беркетеп ҡуйыу, ҡаҙау, тағыу; (*полозья к саням*) табанлау; **прикрепи́ть о́рден** орден тағыу; **прикрепи́ть на кры́ше флаг** ҡыйыҡҡа флаг ҡаҙау; **прикрепи́ть зе́ркало к стене́** көҙгөнө стенаға беркетеү; **прикрепи́ть к саня́м желе́зные поло́зья** сананы тимер менән табанлау **2.** (*передать в чьё-л. ведение*) беркетеү, беркетеп ҡуйыу; **прикрепи́ть ученика́ к ма́стеру** өйрәнсекте оҫтаға беркетеү **3.** (*зарегистрировать где-л.*) теркәү, теркәп ҡуйылыу, иҫәптә тороу

**ПРИКРЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*прочно приделаться*) йәбешеү, беркетелеү **2.** (*стать на учёт*) теркәлеү, иҫәпкә алыныу

**ПРИКРЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **прикрепи́ть**

**ПРИКРЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прикрепи́ться 2.** *страд. от* **прикрепля́ть**

**ПРИКРИ́КИВАТЬ** *несов. см.* **прикри́кнуть**

**ПРИКРИ́КНУТЬ** *сов. на кого* екеренеү, екереү, (асыуланып) ҡысҡырып ҡуйыу; **прикри́кнуть на ребёнка** балаға екереү

**ПРИКРУТИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что, к чему* (*привязать*) уратып (шаҡарып) бәйләү **2.** *что* (*убавить, крутя*) бороп кәметеү (төшөрөү), баҫа төшөү; **прикрути́ть фити́ль в ла́мпе** шәмдең филтәһен баҫа төшөү

**ПРИКРУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **прикрути́ть**

**ПРИКРУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **прикру́чивать**

**ПРИКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **прикры́ть**

**ПРИКРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прикры́ться 2.** *страд. от* **прикрыва́ть**

**ПРИКРЫ́ТИЕ** *с* **1.** *см.* **прикры́ть, прикры́ться 2.** (*укрытие*) япма, ышыҡ, еллек; **хоро́шее прикры́тие от дождя́** ямғырҙан яҡшы ышыҡ **3.** (*защита, охрана*) һаҡ, һаҡлыҡ **4.** *воен.* ышыҡ(лау), һаҡ(лау); **артиллери́йское прикры́тие** артиллерия ышыҡлауы

**ПРИКРЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*защитить, предохранить*) ябыу, ҡаплау, ҡаплап ҡуйыу; **прикры́ть хлеб** икмәкте ҡаплап ҡуйыу; **снег прикры́л зе́млю** ҡар ерҙе япты (ҡапланы) **2.** *кого-что*; *воен.* (*заслонить*) ҡаплау, ышыҡлап тороу; **продвиже́ние во́йска прикры́ли та́нки** ғәскәрҙең алға барыуын танкылар ҡаплап килде **3.** *что* (*неплотно закрыть*) яба биреү, ҡыҫыу, ҡыҫып ҡуйыу, әҙерәк ябыу; **прикры́ть дверь**

ишекте ҡыҫыу **4.** *кого-что*; *перен.* (*скрыть*) йәшереү, ҡаплап ҡалыу, йәшереп ҡалдырыу; **прикры́ть обма́н** ялғанын йәшереү **5.** *что*; *прост.* (*прекратить*, *закрыть*) ябыу, туҡтатыу

**ПРИКРЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *чем* (*накрыться*) ҡапланыу, ябыныу, ышыҡланыу; **прикры́ться шу́бой** тун ябыныу **2.** (*заслониться от чего-л.*) ышыҡланыу, ҡапланыу, артына йәшеренеү **3.** (*неплотно закрыться*) ябыла биреү, ҡыҫылыу, ябыла төшөү **4.** *чем*; *перен.*, *разг.* (*замаскироваться*) ҡапланыу, ышыҡланыу, ышыҡланып ҡалыу; **прикры́ться хвастли́выми слова́ми** маҡтаныу һүҙҙәренә ышыҡланыу

**ПРИКРЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **прикры́ть** **2.** *прил.* ышыҡ, һил

**ПРИКУПА́ТЬ** *несов. см.* **прикупи́ть**

**ПРИКУПИ́ТЬ** *сов. что*, *чего* **1.** өҫтәп һатып алыу **2.** (*в карточной игре*) өҫтәп кәрт алыу

**ПРИКУ́РИВАНИЕ** *с см.* **прику́ривать**

**ПРИКУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **прикури́ть**

**ПРИКУРИ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *разг.* (тәмәке) ҡабыҙыу (тоҡандырыу), ҡабыҙып алыу, тәмәкегә ут алыу (*икенсе кешенән*); **прикури́ть папиро́су** папирос ҡабыҙыу ♦ **дать прикури́ть** *кому прост.* иманын уҡытыу, кәрәген биреү

**ПРИКУ́С** и *спец.* **ПРИ́КУС** *м* тешләнеш, тешләү; **пра́вильный при́кус** дөрөҫ тешләнеш

**ПРИКУСИ́ТЬ** *сов. что* (еңелсә) тешләү, тешләп алыу; **прикуси́ть губу́** ирендe тешләү ♦ **прикуси́ть язы́к** телде йотоу, ауыҙҙы йомоу (*өндәшмәү*, *һөйләшмәү*)

**ПРИКУ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **прикуси́ть**

**ПРИЛА́ВОК** *м* прилавка (*кибеттә*, *баҙарҙа*); **стоя́ть за прила́вком** прилавка артында тороу

**ПРИЛАГА́ТЕЛЬНЫЙ: и́мя прилага́тельное** *грам.* сифат; **прилага́тельное** *с*; *грам.* сифат; **ка́чественное прилага́тельное** төп сифат

**ПРИЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **приложи́ть** 2, 3

**ПРИЛАГА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **прилага́ть**

**ПРИЛА́ДИТЬ** *сов. что*; *разг.* рәтләү, (иплəп, йайлап) ҡуйыу; **прила́дить пружи́ну к двери́** пружинаны ишеккә ҡуйыу

**ПРИЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **прила́дить**

**ПРИЛАСКА́ТЬ** *сов. кого* һөйөү, иркәләү, иркәләп алыу

**ПРИЛАСКА́ТЬСЯ** *сов. к кому* иркәләнеп һыйыныу; **приласка́ться к ма́тери** әсәйгә иркәләнеп һыйыныу

**ПРИЛЕГА́ТЬ** *несов. к чему* **1.** (*об одежде*) һылашып тороу, ултырыу; **пла́тье прилега́ет к те́лу** күлдәк тәнгә һылашып тора **2.** *к чему* (*граничить с чем-л.*) тейеп тороу, тоташыу, сиктәш булыу; **по́ле прилега́ет к бе́регу** баҫыу ярға барып тоташа

**ПРИЛЕЖА́НИЕ** *с* тырышлыҡ, тырышыу, күңел биреп эшләү; **отлича́ться прилежа́нием** тырышлыҡ менән айырылып тороу

**ПРИЛЕЖА́ТЬ** *несов. см.* **прилега́ть** 2

**ПРИЛЕЖА́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **прилежа́ть** **2.** *прил.*; *мат.* теркәлгән, эргәләш, йәнәш; **прилежа́щая сторона́** эргәләш яҡ; **прилежа́щие углы́** теркәлгән мөйөштәр

**ПРИЛЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое тырыш, сымыры, егәрле; **быть приле́жным в рабо́те** эшкә сымыры булыу; **приле́жный учени́к** тырыш уҡыусы

**ПРИЛЕПИ́ТЬ** *сов. что* йәбештереү, йәбештереп ҡуйыу; **прилепи́ть ма́рку на конве́рт** конвертҡа марка йәбештереү

**ПРИЛЕПИ́ТЬСЯ** *сов. к чему* **1.** йәбешеү, һылашыу; **пла́стырь прилепи́лся** пластырь йәбеште **2.** *разг.* урынлашыу, һыйыныу, һыйынып тороу; **до́мик прилепи́лся к скале́** йорт ҡаяға һыйынған

**ПРИЛЕ́ПЛИВАТЬ** *несов. см.* **прилепи́ть**

**ПРИЛЕ́ПЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прилепи́ться** **2.** *страд. от* **приле́пливать**

**ПРИЛЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **прилепи́ть**

**ПРИЛЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прилепи́ться** **2.** *страд. от* **прилепля́ть**

**ПРИЛЁТ** *м см.* **прилете́ть** — **прилета́ть**; **прилёт птиц** ҡоштар ҡайтыу

**ПРИЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **прилете́ть**

**ПРИЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** осоп килеү (ҡайтыу); **пти́цы прилета́ют** ҡоштар осоп ҡайта **2.** *разг.* (*примчаться*) сабып (елдереп) килеп етеү

**ПРИЛЁТНЫЙ,** -ая, -ое (*о птицах*) күсмә, күсәр

**ПРИЛЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** (*лечь ненадолго*) ятып алыу (тороу); **приле́чь на дива́н** диванға ятып тороу **2.** (*пригнуться*) ятыу, ығыу; **рожь прилегла́** арыш ыҡҡан **3.** (*осесть*) ултырыу; **пыль прилегла́** саң ултырған

**ПРИЛИ́В** *м* **1.** *мор.* һыу ҡалҡыу, һыу күтәрелеү (*ай менән ҡояштың тартыуы арҡаһында*); **начался́ прили́в** һыу ҡалҡа башланы **2.** *перен.* (*подъём в развитии чего-л.*) күтәрелеү, ташыу, артыу; **прили́в стра́сти** ҡомар ташыу **3.** *мед.* (*приток крови*) ҡан йүгереү (тулышыу); **прили́в кро́ви к голове́** башҡа ҡан йүгереү **4.** (*прибытие кого-чего-л. во множестве*) күпләп килеү, ағылып килеп йыйылыу; **прили́в де́нежных средств** аҡсаның күпләп килеүе **5.** *тех.* (деталдең) йыуан ере (урыны)

**ПРИЛИВА́ТЬ** *несов. см.* **прили́ть**

**ПРИЛИ́ЗАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **прилиза́ть** **2.** *прил.*; *разг.* (*о волосах*) шыма итеп таралған; (*о шерсти животных*) яланған, ялаған

**ПРИЛИЗА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*пригладить языком*) ялап шымартыу (тигеҙләү); **ко́шка прилиза́ла шерсть** бесәй ялап йөнөн шымартты **2.** *перен.* (*гладко причесать*) шыма итеп тарау, ялағандай итеп тарап ҡуйыу

**ПРИЛИЗА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шып-шыма итеп тарап ҡуйыу

**ПРИЛИ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **прилиза́ть**

**ПРИЛИ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прилиза́ться** **2.** *страд. от* **прили́зывать**

**ПРИЛИПА́ТЬ** *несов. см.* **прили́пнуть**

**ПРИЛИ́ПНУТЬ** *сов.* **1.** (*пристать — о чём-л. липком*) йәбешеү, һылашыу, йәбешеп ҡалыу; **грязь прили́пла к оде́жде** кейемгә батҡаҡ йәбешкән **2.** *перен., разг.* (*привязаться*) йәбешеү, тағылып алыу, бәйләнеү

**ПРИЛИ́ПЧИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*легко прилипающий*) һырышҡаҡ, йәбешкәк, йәбештереүсән **2.** *перен., разг.* (*надоедливый*) бәйләнсек, бәйләнеүсән, йәбешкәк **3.** *перен., разг.* (*легко передающийся другим*) йоғошло, йоғоусан; **прили́пчивая боле́знь** йоғошло ауырыу

**ПРИЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*притечь — о жидкости*) ағып төшөү, йүгереү; **кровь прилила́ к голове́** башҡа ҡан йүгергән **2.** *перен.* (*внезапно возникнуть — о чувстве*) ҡапыл уяныу, ташып китеү, солғап алыу

**ПРИЛИ́ЧИЕ** *с* әҙәп, әҙәплелек, әҙәп һаҡлау; **соблюда́ть прили́чия** әҙәп һаҡлау; **де́лать для прили́чия** әҙәп һаҡлау өсөн эшләү

**ПРИЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*пристойный*) тәрбиәле, әҙәпле; **прили́чное сло́во** әҙәпле һүҙ; **прили́чные лю́ди** әҙәпле кешеләр **2.** *разг.* (*довольно хороший*) яҡшы уҡ, яҡшы ғына, күп кенә, ҡәнәғәтләнерлек, ап-арыу; **прили́чная су́мма** күп кенә аҡса; **прили́чный костю́м** яҡшы ғына костюм

**ПРИЛОВЧИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* өйрәнеп (оҫтарып) алыу, рәтен (уңайын) табып алыу, күнегеп бөтөү

**ПРИЛОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **приложи́ть**; **приложе́ние докуме́нтов к заявле́нию** ғаризаға документтарҙы ҡушыу (теркәү) **2.** ҡушымта, өҫтәмә; **приложе́ние к догово́ру** килешеүгә ҡушымта; **журна́л с приложе́нием** ҡушымталы журнал **3.** *грам.* өҫтәлмәлек; **обосо́бленное приложе́ние** айырымланған өҫтәлмәлек

**ПРИЛОЖИ́ТЬ** *сов. что, к чему* **1.** ҡуйыу, ябыу; **приложи́ть пла́стырь к ожо́гу** янған (бешкән) ергә пластырь ябыу; **приложи́ть ру́ку к груди́** ҡулды күкрәккә ҡуйыу **2.** (*применить*) һалыу, ҡуйыу, ҡулланыу, йүнәлдереү; **приложи́ть все си́лы** бөтә көстө һалыу; **приложи́ть тео́рию к жи́зни** теорияны тормошта ҡулланыу **3.** (*присоединить*) ҡушыу, ҡушып ебәреү (һалыу), теркәү; **приложи́ть спра́вку** белешмәне теркәү ♦ **приложи́ть ру́ку** *см.* **рука́**; **ума́ не приложу́** *см.* **ум**

**ПРИЛОЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*приблизиться вплотную*) яҡын килеү, терәлеү, ҡуйыу; **приложи́ться у́хом к двери́** ҡолаҡты ишеккә ҡуйып тыңлау **2.** (*почтительно поцеловать*) ололап үбеү; **приложи́ться к зна́мени** байраҡты ололап үбеү **3.** (*прилечь щекой к ложу винтовки и т.п., чтобы прицелиться*) күҙәтеү; **приложи́ться и вы́стрелить** тоҫҡап атып ебәреү **4.** *прост.* (*отпить из чего-л.*) ауыҙ итеү, иренгә тейҙереү; **хоть бы приложи́лся** иренәнә тейҙерһен ине ♦ **остально́е (всё, про́чее) прило́жится** ҡалғаны үҙенән-үҙе булыр

**ПРИЛУНИ́ТЬСЯ** *сов.* Айға төшөү

**ПРИЛЬНУ́ТЬ** *сов. к кому-чему* **1.** һырығыу, һарылыу, һырышыу, һыйыныу; **ребёнок прильну́л к ма́тери** бала әсәһенә һыйынды **2.** (яҡындан) ҡарау; **прильну́ть к замо́чной сква́жине** йоҙаҡ тишегенән ҡарау

**ПРИ́МА** *ж*; *муз.* прима (**1.** *гаммала беренсе төп тауыш* **2.** *ҡыллы музыкаль инструменттың беренсе нескә ҡылы* **3.** *оркестрҙа, хорҙа беренсе партияны башҡарыусы музыка ҡоралы йәки йырсы*)

**ПРИ́МА-БАЛЕРИ́НА** *ж* прима-балерина (*төп ролдәрҙе башҡарыусы балерина*)

**ПРИМА́ЗАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тығылыу, йәбешеү

**ПРИМА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **прима́заться**

**ПРИМА́НИВАТЬ** *несов. см.* **примани́ть**

**ПРИМАНИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** алдаштырып саҡырыу (килтереү); **примани́ть голубе́й** күгәрсендәрҙе алдаштырып саҡырыу **2.** *перен., разг.* (*соблазнить*) үҙ яғына ауҙарыу, әүрәтеү

**ПРИМА́НКА** *ж* **1.** (*для животных, рыб и др.*) алдаҡыс ем, алдаҡыс, ҡаптырғыс **2.** *перен.* (*соблазн*) алдаҡыс, ҡыҙыҡтырғыс

**ПРИМА́НОЧНЫЙ,** -ая, -ое алдаҡыс (ҡыҙыҡтырғыс) ...ы; **прима́ночная снедь** алдаҡыс нәмә

**ПРИМА́Т** *м*; *книжн.* (*первичность, главенство*) примат, юғарылыҡ, өҫтөнлөк, беренселек; **прима́т ра́зума над чу́вством** аңдың хис-тойғонан өҫтөнлөгө

**ПРИМА́ТЫ** *мн.*; *зоол.* приматтар (*һөтимәрҙәр төркөмөнөң иң юғары отряды*)

**ПРИМА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **примочи́ть**

**ПРИМА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **примости́ть**

**ПРИМА́ЩИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **примости́ться 2.** *страд. от* **прима́щивать**

**ПРИМЕЛЬКА́ТЬСЯ** *сов.* танышып (күҙ өйрәнеп) бөтөү

**ПРИМЕНЕ́НИЕ** *с см.* **примени́ть — применя́ть**, **примени́ться — применя́ться**; **примене́ние но́вых ме́тодов** яңы ысулдар ҡулланыу ♦ **в примене́нии к** *кому-чему*; *в знач. предлога* -ға/-гә ҡарата (ярашлы), рәүештә, -ға/-гә ҡарап (алғанда)

**ПРИМЕНИ́МЫЙ,** -ая, -ое ярарлыҡ, ҡулланырлыҡ, ҡулланырға яраған (мөмкин булған)

**ПРИМЕНИ́ТЕЛЬНО: примени́тельно к** *кому-чему*; *в знач. предлога* -ға/-гә ҡарата (ярашлы), рәүештә

**ПРИМЕНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡулланыу, файҙаланыу; **примени́ть но́вое лека́рство** яңы дарыу ҡулланыу; **применя́ть зна́ния в жи́зни** белемде тормошта ҡулланыу **2.** (*приспособить*) яйлаштырыу; **примени́ть ору́дия к ме́стности** туптарҙы урынға яйлаштырыу

**ПРИМЕНИ́ТЬСЯ** *сов. к кому-чему* яраҡлашыу, күнегеү, үҙләшеү

**ПРИМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **примени́ть**

**ПРИМЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **примени́ться** **2.** *страд. от* **применя́ть**

**ПРИМЕ́Р** *м* **1.** өлгө, үрнәк; **быть приме́ром** өлгө булыу; **брать приме́р** өлгө алыу; **приме́р му́жества** батырлыҡ үрнәге **2.** (*частный случай, приводимый в доказательство чего-л.*) миҫал; **уда́чный приме́р** уңышлы миҫал **3.** *мат.* хисап, миҫал; **реша́ть приме́р** хисап сисеү ♦ **для приме́ра** ғибрәт өсөн; **к приме́ру (сказа́ть)** мәҫәлән, миҫал өсөн; **не в приме́р**: 1) *кому-чему* айырмалы булараҡ; 2) *при сравн. ст.* күпкә, шаҡтай; **брать (взять) приме́р** *с кого* үрнәк алыу

**ПРИМЕРЗА́ТЬ** *несов. см.* **примёрзнуть**

**ПРИМЁРЗНУТЬ** *сов.* (йәбешеп) туңыу

**ПРИМЕ́РИВАТЬ** *несов. см.* **приме́рить**

**ПРИМЕ́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приме́риться** **2.** *страд. от* **приме́ривать**

**ПРИМЕ́РИТЬ** *сов. что* үлсәү, үлсәп (кейеп) ҡарау; **приме́рить костю́м** костюмды кейеп ҡарау

**ПРИМЕ́РИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* яйлашыу, яйлашып ҡарау, яйын табыу, самалау

**ПРИМЕ́РКА** *ж см.* **приме́рить** — **примеря́ть**; **приме́рка пальто́** пальто кейеп ҡарау

**ПРИМЕ́РНО** *нареч.* **1.** шундайыраҡ, сама менән, самаһы, яҡынса; **ей приме́рно со́рок лет** уға сама менән ҡырҡ йәш **2.** *в знач. вводн. сл.*; *разг., уст.* (*например*) миҫал өсөн

**ПРИМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*образцовый*) өлгөлө, өлгө, үрнәк булырлыҡ; **приме́рное поведе́ние** өлгөлө тәртип **2.** (*приблизительный*) яҡынса, сама менән, самалау өсөн; **приме́рный подсчёт** сама менән һанау (иҫәпләү)

**ПРИМЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **приме́рить**

**ПРИМЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приме́риться** **2.** *страд. от* **примеря́ть**

**ПРИМЕСИ́ТЬ** *сов. что, чего* ҡатыштырып иҙеү, ҡушып баҫыу

**ПРИ́МЕСЬ** *ж* ҡушылма, ҡатышма; **сортова́я при́месь** сортлы ҡушылма; **очища́ть от при́месей** ҡушылмаларҙан таҙартыу

**ПРИМЕ́ТА** *ж* **1.** (*отличительный признак*) билдә, тамға; **осо́бые приме́ты** айырым билдәләр **2.** (*предвестие чего-л.*) ырым, юрау; **ве́рить в приме́ты** ырымдарға ышаныу **3.** *обычно мн.* **приме́ты** һынамыштар; **су́дя по приме́там** һынамыштарға ҡарағанда ♦ **на приме́те (быть, име́ться)** *у кого* күҙ уңында (булыу); **на приме́те име́ть (держа́ть)** *кого-что* күҙ уңында тотоу, күҙҙә тотоу

**ПРИМЕТА́ТЬ** *сов. что* типсеү, типсеп сығыу, типсеп ҡуйыу; **приметА́ть рука́в** еңде типсеп ҡуйыу

**ПРИМЕ́ТИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* (*заметить*) иҫләү, иғтибар итеү, күреп алыу, шәйләү

**ПРИМЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*заметный*) күренеп (һиҙелеп) торған, билдәле, бик асыҡ; **приме́тный след** бик асыҡ эҙ **2.** (*являющийся приметой*) тамғалы; **приме́тный нож** тамғалы бысаҡ **3.** (*имеющий особые приметы*) билдәле, күренекле

**ПРИМЁТЫВАТЬ** *несов. см.* **примета́ть**

**ПРИМЕЧА́НИЕ** *с* иҫкәрмә; **снабди́ть текст примеча́ниями** тексты иҫкәрмәләр менән биреү (тулыландырыу)

**ПРИМЕЧА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое иғтибар итерлек, иғтибарға лайыҡ, бик шәп; **примеча́тельное собы́тие** бик шәп ваҡиға; **быть примеча́тельным** иғтибарға лайыҡ булыу

**ПРИМЕЧА́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *см.* **приме́тить** **2.** *за кем-чем*; *прост.* (*наблюдать*) күҙәтеү, ҡарап тороу

**ПРИМЕША́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* (*мешая, прибавить*) ҡушыу, ҡатыштырыу, һалып ҡатыштырыу, аралаштырып бутау; **примеша́ть песо́к к гли́не** балсыҡҡа ҡом ҡушыу **2.** *кого-что*; *перен., разг.* (*вовлечь*) ҡатнаштырыу, ҡатыштырыу

**ПРИМЕША́ТЬСЯ** *сов.* ҡушылыу, өҫтәлеү; **к голоса́м птиц примеша́лся шум** ҡоштарҙың тауышына шау-шыу ҡушылды

**ПРИМЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **примеси́ть**

**ПРИМЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **примеша́ть**

**ПРИМЕ́ШИВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **приме́шивать** I

**ПРИМЕ́ШИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **примеша́ться** **2.** *страд. от* **приме́шивать** II

**ПРИМИНА́ТЬ** *несов. см.* **примя́ть**

**ПРИМИНА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **примя́ться** **2.** *страд. от* **симина́ть**

**ПРИМИРЕ́НЕЦ** *м* килешеүсе, килешеп ҡараусы

**ПРИМИРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **примири́ть** — **примиря́ть**, **примири́ться** — **примиря́ться**; **примире́ние проти́вников** ҡаршы яҡтарҙы килештереү **2.** (*мир, согласие*) тыныслыҡ, татыулыҡ

**ПРИМИРЕ́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое килешеүселек, килешеүсәнлек ...ы; **примире́нческая поли́тика** килешеүсәнлек сәйәсәте

**ПРИМИРЕ́НЧЕСТВО** *с* килешеүсәнлек, килешеп ҡараусылыҡ, килешеүселек

**ПРИМИРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, ое килешергә (татыулашырға) теләгән, килешеүсән; **примири́тельный тон** килешеүсән тон

**ПРИМИРИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*помирить*) килештереү, татыулаштырыу, яраштырыу **2.** (*вызвать терпимое отношение*) күндереү, (түҙергә) риза итеү, ризалаштырыу

**ПРИМИРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *с кем-чем* и *без доп.*; *разг.* (*помириться*) килешеү, татыулашыу, ярашыу **2.** *с чем* (*терпимо отнестись к чему-л.*) күнеү, риза булыу, ризалашыу, буйһоноу; **примири́ться с судьбо́й** яҙмышҡа буйһоноу

**ПРИМИРЯ́ТЬ** *несов. см.* **примири́ть**

**ПРИМИРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **примири́ться** **2.** *страд. от* **примиря́ть**

**ПРИМИТИ́В** *м* примитив, артыҡ ябай нәмә, камиллашмаған нәмә

**ПРИМИТИВИ́ЗМ** *м* примитивлыҡ, сикләнгәнлек

**ПРИМИТИ́ВНОСТЬ** *ж* **1.** (*простота, несложность*) примитивлыҡ, артыҡ ябайлыҡ **2.** (*ограниченность, упрощённость*) тупаҫлыҡ, тар (һай) ҡарашлылыҡ, сикләнгәнлек; **примити́вность взгля́дов** ҡараштарҙың сикләнгәнлеге

**ПРИМИТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*первобытный*) бик боронғо, тәүтормоштағы **2.** (*ограниченный*) примитив, тупаҫ, тар ҡарашлы; **примити́вное сужде́ние** һай фекер **3.** (*простой, несложный*) примитив, артыҡ ябай, камиллашмаған; **примити́вный механи́зм** примитив механизм

**ПРИМКНУ́ТЬ** *сов.* **1.** (*присоединиться к кому-чему-л.*) ҡушылыу, эйәреү **2.** (*придвинуться вплотную*) яҡынайыу, тоташыу, йәнәш тороу, эргәһенә килеп баҫыу **3.** (*стать на чью-л. сторону*) яғына күсеү, бер яҡлы булып китеү

**ПРИМО́ЛКНУТЬ** *сов.*; *разг.* шымыу, тымыу, шым булыу

**ПРИМОРО́ЗИТЬ** *сов.* **1.** (*прикрепить к чему-л. под действием холода*) ҡуша туңдырыу, ҡатырыу **2.** *разг.* (*слегка отморозить*) һалҡын тейеү, әҙ генә өшөү **3.** *безл.* туңаҙытыу, туңғаҡлау; **зе́млю приморо́зило** ерҙе туңаҙытты

**ПРИМОРО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **приморо́зить** **2.** *прил.* туңғаҡ, туңғаҙаҡ, туң; **приморо́женная доро́га** туңғаҡ юл

**ПРИМО́РСКИЙ,** -ая, -ое диңгеҙ буйындағы (эргәһендәге); **примо́рский го́род** диңгеҙ буйындағы ҡала

**ПРИМО́РЬЕ** *с* диңгеҙ буйы, диңгеҙ эргәһе (яны)

**ПРИМОСТИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* урынлаштырыу, ҡуйыу (*яйһыҙ урынға*)

**ПРИМОСТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* урынлашыу, терәлеү (*яйһыҙ*)

**ПРИМОЧИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** (*смочить немного*) һыулау, еүешләү, сылатыу **2.** (*приложить примочку*) еүешләтеү, еүеш нәмә ябыу (һалыу)

**ПРИМО́ЧКА** *ж* сылатҡыс (*марля киҫәген сылатып ауыртҡан ерҙе ҡаплау өсөн ҡулланыла торған шыйыҡ дарыу*); **сде́лать примо́чку** сылатҡыс ябыу (ҡуйыу)

**ПРИ́МУЛА** *ж* примула, кәкүк емеше, кәзә һаҡалы (*күп йыллыҡ үҫемлек*)

**ПРИ́МУС** *м* примус; **подогре́ть чай на при́мусе** примуста сәй йылытыу

**ПРИМЧА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что* (*привезти очень быстро*) йүгертеп (саптырып, елдертеп, осортоп, бик йәһәт) килтереп еткереү **2.** *см.* **примча́ться**

**ПРИМЧА́ТЬСЯ** *сов.* йүгереп (сабып, елеп, осоп) килеү (килеп етеү)

**ПРИМЫКА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **примыка́ть** **2.** *грам.* йәнәшәлек; **связь спо́собом примыка́ния** йәнәшәлек юлы менән бәйләнеш

**ПРИМЫКА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **примкну́ть** **2.** (*прилегать к чему-л.*) йәнәшә булыу (тороу), килеп тоташыу, сиктәш булыу; **на́ши дворы́ примыка́ют друг к дру́гу** беҙҙең йорттар йәнәшә тора **3.** *грам.* йәнәшәлек менән бәйләнеү; **наре́чие примыка́ет к глаго́лу** рәүеш ҡылымға йәнәшәлек менән бәйләнә

**ПРИМЯ́ТЬ** *сов. что* йәмшәйтеү, иҙеү, тапау; **примя́ть поду́шку** мендәрҙе иҙеү; **примя́ть траву́** үләнде тапау

**ПРИМЯ́ТЬСЯ** *сов.* йәмшәйеү, йәнселеү, тапалыу

**ПРИНАДЛЕЖА́ТЬ** *несов.* **1.** *кому-чему* (*составлять чью-л. собственность*) -дыҡы/-деке (булыу), (бирәүгә) ҡарау; **кни́га принадлежи́т мне** китап минеке; **э́та иде́я принадлежи́т не им** был фекер уларҙыҡы түгел **2.** *к кому-чему* булыу, иҫәбенә инеү, һаналыу; **он принадлежи́т к числу́ изве́стных писа́телей** ул билдәле яҙыусылар иҫәбенә инә

**ПРИНАДЛЕ́ЖНОСТЬ** *ж* **1.** *обычно мн.* **принадле́жности** әйбер, кәрәк-яраҡ, йыһаз; **канцеля́рские принадле́жности** кәнсәләр кәрәк-ярағы; **посте́льные принадле́жности** урын-ер (түшәк) әйберҙәре **2.** *к чему* (*вхождение в состав чего-л.*) ҡарағанлыҡ, булыу, тороу; **принадле́жность к па́ртии** фирҡәгә ҡарағанлыҡ

**ПРИНАЛЕ́ЧЬ** *сов. на что*; *разг.* **1.** бер аҙ баҫыу, баҫа төшөү, шәберәк башлау; **принале́чь на вёсла** шәберәк ишә башлау **2.** *перен.* (*усердно приняться за что-л.*) нығыраҡ тотоноу, көс һалып эшләү

**ПРИНАРЯДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* кейендереү, ҡупшылап (матур итеп) кейендереү

**ПРИНАРЯДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* матурланыу, ҡупшылап кейенеү, кейенеп-яһанып алыу

**ПРИНАРЯЖА́ТЬ** *несов. см.* **принаряди́ть**

**ПРИНАРЯЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **принаряди́ться** **2.** *страд. от* **принаряжа́ть**

**ПРИНЕВО́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **принево́лить**

**ПРИНЕВО́ЛИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* мәжбүр итеү, ирекһеҙләү

**ПРИНЕСЕ́НИЕ** *с см.* **принести́ — приноси́ть** 2, 3; **принесе́ние прися́ги** ант итеү; **принесе́ние благода́рности** рәхмәт әйтеү

**ПРИНЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* (*неся, доставить*) килтереү, алып килеү, алып ҡайтыу; **принести́ цветы́** сәскә алып килеү; **приноси́ть кни́ги из библиоте́ки** китапхананан китаптар килтереү **2.** *что* (*дать как результат*) килтереү, биреү; **принести́ дохо́д** килем биреү; **принести́ по́льзу** файҙа килтереү **3.** *что* биреү, итеү, әйтеү; **принести́ кля́тву** ант итеү; **принести́ благода́рность**

рәхмәт әйтеү; **принести́ в же́ртву** ҡорбан итеү **4.** *кого-что*; *разг.* (*дать потомство — о животных*) (үрсем, уңыш) килтереү; (*дать урожай — о растениях*) биреү; **коза́ принесла́ двух козля́т** кәзә ике бәрәс килтерҙе; **дере́вья принесли́ плоды́** ағастар емеш бирҙе ♦ **принести́ в же́ртву** *см.* **же́ртва**; **нелёгкая принесла́** *см.* **нелёгкий**

**ПРИНЕСТИ́СЬ** *сов.*; *разг.* (тиҙ) килеп етеү, (тиҙ) килеү; (*о звуках*) ишетелеү

**ПРИНИЖА́ТЬ** *несов. см.* **прини́зить**

**ПРИНИ́ЖЕННОСТЬ** *ж* кәмһетелгәнлек, меҫкенлек

**ПРИНИ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **прини́зить 2.** *прил.* (*смиренный*) кәмһенеүле, меҫкен; **прини́женный вид** меҫкен ҡиәфәт **3.** *прил.* (*унизительный*) кәмһетә торған, кәмһетеүсе; **прини́женное положе́ние** кәмһетә торған хәл

**ПРИНИ́ЗИТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*унизить*) түбәнһетеү, түбәнгә төшөрөү, кәмһетеү **2.** (*умалить значение*) түбәнәйтеү, кесерәйтеү, кәметеп (кесерәйтеп) күрһәтеү, төшөрөү; **прини́зить значе́ние** *чего-л. нимәнеңдер* әһәмиәтен кәмһетеп күрһәтеү

**ПРИНИКА́ТЬ** *несов. см.* **прини́кнуть**

**ПРИНИ́КНУТЬ** *сов.* **1.** *к кому-чему* һырығыу, яҡын килеү, башты (ҡолаҡты) ҡуйыу (терәү); **прини́кнуть у́хом к две́ри** ишеккә ҡолаҡты терәү **2.** *перен.*, *разг.* (*притихнуть, притаиться*) боҫоу, шымып ҡалыу, тыныу

**ПРИНИМА́ТЬ** *несов. см.* **приня́ть**; **принима́ть госте́й** ҡунаҡтар ҡабул итеү

**ПРИНИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приня́ться 2.** *страд. от* **принима́ть**

**ПРИНОРА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **принорови́ть**

**ПРИНОРА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **принорови́ться 2.** *страд. от* **принора́вливать**

**ПРИНОРОВИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* яраҡлаштырыу, ҡулайлаштырыу, ҡулайлау

**ПРИНОРОВИ́ТЬСЯ** *сов. к кому-чему и без. доп.*; *разг.* яйлашыу, яраҡлашыу, ҡулайлашыу, уңайлашыу; **принорови́ться к совреме́нным усло́виям** хәҙерге шарттарға ҡулайлашыу

**ПРИНОРОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **принорови́ть**

**ПРИНОРОВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **принорови́ться 2.** *страд. от* **приноровля́ть**

**ПРИНОСИ́ТЬ** *несов. см.* **принести́**

**ПРИНОСИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **принести́сь 2.** *страд. от* **приноси́ть**

**ПРИНОШЕ́НИЕ** *с* бүләк; (*дар, пожертвование служителям культа*) саҙаҡа; **подноси́ть приноше́ния** саҙаҡа биреү; **бога́тые приноше́ния** мул бүләк

**ПРИНУДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* мәжбүрилек; **принуди́тельность постановле́ния** ҡарарҙың мәжбүрилеге

**ПРИНУДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мәжбүри, көсләп үтәлгән; **принуди́тельные ме́ры** мәжбүри саралар; **принуди́тельный труд** мәжбүри хеҙмәт; **принуди́тельное лече́ние** мәжбүри дауалау

**ПРИНУ́ДИТЬ** *сов. кого-что, к чему* и *с неопр.* мәжбүр итеү, ирекһеҙләү; **прину́дить рабо́тать** эшләргә мәжбүр итеү

**ПРИНУЖДА́ТЬ** *несов. см.* **прину́дить**

**ПРИНУЖДА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **принужда́ть**

**ПРИНУЖДЕ́НИЕ** *с см.* **прину́дить — принужда́ть**; **сде́лать по принужде́нию** мәжбүр иткәнгә эшләү

**ПРИНУЖДЁННОСТЬ** *ж* яһалмалыҡ

**ПРИНУЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **прину́дить 2.** *прил.* яһалма

**ПРИНЦ** *м* принц

**ПРИНЦЕ́ССА** *ж* принцесса

**ПРИ́НЦИП** *м*; *в разн. знач.* принцип, нигеҙ, асыл, төп ҡағиҙә, фекер, ҡараш; **твёрдые при́нципы** ныҡлы принциптар; **при́нцип причи́нности** *физ.* сәбәплелек принцибы; **при́нципы демокра́тии** демократияның төп ҡағиҙәләре ♦ **в при́нципе** нигеҙҙә, асылда; **из при́нципа** принциптан сығып

**ПРИНЦИПИА́ЛЬНОСТЬ** *ж* принципиаллек, принципиаль булыу, принциплылыҡ

**ПРИНЦИПИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** принципиаль, принципҡа нигеҙләнгән; **принципиа́льный вопро́с** принципиаль мәсьәлә **2.** (*придерживающийся принципов*) принциплы, принципиаль; **принципиа́льный челове́к** принципиаль кеше; **принципиа́льная поли́тика** принципиаль сәйәсәт

**ПРИНЮ́ХАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** *к чему* (*привыкнуть к запаху*) еҫкә танау өйрәнеү, еҫкә күнегеп китеү **2.** (*понюхав, распознать запах*) еҫкәнеп һиҙеү, еҫте айырыу

**ПРИНЮ́ХИВАТЬСЯ** *несов. см.* **принюхаться**

**ПРИНЯ́ТИЕ** *с см.* **приня́ть**; **приня́тие реше́ния** ҡарар ҡабул итеү

**ПРИ́НЯТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **приня́ть 2.** *прил.* ҡабул ителгән, ҡабул итеп алынған, алынған; **при́нятая собра́нием резолю́ция** йыйылыш ҡабул иткән резолюция **2.** *прил.* (*установленный*) ғәҙәттәге, ҡабул ителгән, ғәҙәткә ингән; **так при́нято** шулай ғәҙәткә ингән

**ПРИНЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*взять то, что дают*) алыу, ҡабул итеү; **приня́ть пода́рок** бүләк алыу; **приня́ть телегра́мму** телеграмма ҡабул итеү **2.** *кого-что* (*зачислить*) алыу, ҡабул итеү; **приня́ть на рабо́ту** эшкә алыу; **приня́ть в па́ртию** фирҡәгә алыу; **приня́ть предложе́ние** тәҡдимде ҡабул итеү **3.** *кого-что* (*взять к себе, предоставить место*) ҡабул итеү; **приня́ть больны́х** ауырыуҙы ҡабул итеү **4.** *что* (*с некоторыми сущ. образует сочетания со значением того или иного действия*) ҡабул итеү, -ға/-гә килеү, күреү; **приня́ть но́вый зако́н** яңы закон ҡабул итеү; **приня́ть реше́ние** ҡарарға килеү; **приня́ть ме́ры** сара күреү **5.** (*приобрести какой-л. вид*)

төҫ (күренеш) алыу, булып китеү; **приня́ть фо́рму ша́ра** шар формаһы алыу **6.** *что, чего* (*выпить, проглотить*) эсеү, йотоу, ҡабул итеү; **приня́ть лека́рство** дарыу эсеү **7.** *кого-что* (*признать*) -ға/-гә алыу, тип уйлау (һанау, белеү); **приня́ть за знако́мого** таныш тип уйлау ♦ **приня́ть во внима́ние** *см.* **внима́ние**; **приня́ть к све́дению** иҫәпкә алыу; **приня́ть на себя́** *см.* **себя́**; **приня́ть на ве́ру** *см.* **ве́ра**; **приня́ть на свой счёт** *см.* **счёт**

**ПРИНЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *за что* и *с неопр.* (*приступить*) тотоноу, керешеү, башлау; **приня́ться за уро́к** дәрескә тотоноу **2.** (*о растениях*) тамыр йәйеү, үҫеп китеү, терелеү; **я́блоня приняла́сь** алмағас үҫеп китте **3.** (*привиться — о вакцине*) сығыу; **о́спа приняла́сь** сәсәк сыҡты

**ПРИОБОДРИ́ТЬ** *сов. кого-что* дәртләндереп (рухландырып) ебәреү, бер аҙ күңелен күтәреү

**ПРИОБОДРИ́ТЬСЯ** *сов.* дәртләнеп (рухланып) китеү, дәртләнә төшөү

**ПРИОБОДРЯ́ТЬ** *несов. см.* **приободри́ть**

**ПРИОБОДРЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **приободри́ться**

**ПРИОБРЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* алыу, булдырыу, һатып алыу, табыу; **приобрести́ интере́сную кни́гу** ҡыҙыҡ китап алыу **2.** *разг.* (*завести*) булдырыу; **приобрести́ друзе́й** дуҫтар булдырыу **3.** (*получить какие-л. свойства*) ирешеү, эйә булыу, алыу, туплау; **приобрести́ зна́ния** белемгә эйә булыу; **приобрести́ о́пыт** тәжрибә туплау; **приобрести́ но́вое значе́ние** яңы мәғәнә алыу **4.** (*снискать*) ҡаҙаныу, сығыу; **приобрести́ сла́ву** дан ҡаҙаныу; **приобрести́ дурну́ю репута́цию** яманаты сығыу

**ПРИОБРЕТА́ТЬ** *несов. см.* **приобрести́**

**ПРИОБРЕТЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **приобрести́** — **приобрета́ть** **2.** (*то, что приобретено*) һатып алынған нәмә, тауар **3.** (*важный, существенный предмет, явление*) ҡаҙаныш, уңыш, өлгәш; **це́нное приобрете́ние культу́ры** мәҙәниәттең ҡиммәтле ҡаҙанышы

**ПРИОБЩА́ТЬ** *несов. см.* **приобщи́ть**

**ПРИОБЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приобщи́ться** **2.** *страд. от* **приобща́ть**

**ПРИОБЩЕ́НИЕ** *с см.* **приобщи́ть** — **приобща́ть** 1, **приобщи́ться** — **приобща́ться**; **приобще́ние к культу́ре** мәҙәниәткә тартылыу

**ПРИОБЩИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого, к чему* ылыҡтырыу, тартыу, таныштырыу, аралаштырыу; **приобщи́ть к культу́ре** мәҙәниәткә ылыҡтырыу **2.** *что, к чему*; *офиц.-дел.* (*приложить*) ҡушыу, теркәү, беркетеү; **приобщи́ть спра́вку к де́лу** ғаризаны эш ҡағыҙына теркәү

**ПРИОБЩИ́ТЬСЯ** *сов. к чему* тартылыу, аралашыу, ылығыу; **приобщи́ться к рели́гии** дингә ылығыу

**ПРИОДЕ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** (*снабдить одеждой*) өҫтөн-башын (өҫ-башын) бөтәйтеү, кейендереү, кейем-һалым биреү **2.** (*принарядить*) яҡшы итеп кейендереү, яҡшы кейемдәр кейҙереү

**ПРИОДЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** өҫ-башты ҡарау, кейем-һалым алыу **2.** (*принарядиться*) ҡупшы итеп кейенеү, яҡшы кейемдәр кейеү

**ПРИОЗЁРНЫЙ,** -ая, -ое күл буйындағы (эргәһендәге); **приозёрные луга́** күл буйындағы туғайлыҡтар

**ПРИОРИТЕ́Т** *м* **1.** (*первенство по времени в научном открытии, изобретении и т.п.*) приоритет, беренселек **2.** (*преобладающее значение*) приоритет, өҫтөнлөк

**ПРИОСА́НИВАТЬСЯ** *несов. см.* **приоса́ниться**

**ПРИОСА́НИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һын турайтыу, мөһабәтләнеү, олпатланыу, (күкрәк киреп) турайыу

**ПРИОСТАНА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **приостанови́ть**

**ПРИОСТАНА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приостанови́ться** **2.** *страд. от* **приостана́вливать**

**ПРИОСТАНОВИ́ТЬ** *сов. кого-что* туҡтатып тороу, (бер аҙға) туҡтатыу; **приостанови́ть движе́ние** хәрәкәтте бер аҙға туҡтатыу; **приостанови́ть рабо́ту** эште туҡтатып тороу

**ПРИОСТАНОВИ́ТЬСЯ** *сов.* туҡтап тороу, (бер аҙға) туҡтау (туҡталыу)

**ПРИОСТАНО́ВКА** *ж см.* **приостанови́ть** — **приостана́вливать**, **приостанови́ться** — **приостана́вливаться**; **приостано́вка вое́нных де́йствий** һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатып тороу

**ПРИОТВОРИ́ТЬ** *сов. что* бер аҙ асыу, ҡыҫып ҡуйыу, ҡыҫа биреү (төшөү)

**ПРИОТВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* бер аҙ (аҙыраҡ) асылыу, асыла төшөү; **дверь приотвори́лась** ишек бер аҙ асылды

**ПРИОТВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **приотвори́ть**

**ПРИОТВОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приотвори́ться** **2.** *страд. от* **приотворя́ть**

**ПРИОТКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **приоткры́ть**

**ПРИОТКРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приоткры́ться** **2.** *страд. от* **приоткрыва́ть**

**ПРИОТКРЫ́ТЬ** *сов.* бер аҙ (аҙыраҡ) асыу, аса төшөү, ҡыҫып ҡуйыу ♦ **приоткры́ть заве́су** серҙе аса төшөү (биреү)

**ПРИОТКРЫ́ТЬСЯ** *сов.* бер аҙ (аҙыраҡ) асылыу, асыла төшөү

**ПРИОХО́ТИТЬ** *сов. кого-что, к чему*; *разг.* теләк тыуҙырыу, дәрт ҡуҙғалтыу, ҡыҙыҡһындырыу, ҡыҙыҡтырыу, ҡомарландырыу

**ПРИОХО́ТИТЬСЯ** *сов. к чему*; *разг.* өйрәнеп (күнегеп) китеү, әүәҫләнеү (*бер эш-хәлгә*)

**ПРИПАДА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **припа́сть** **2.** *разг.* (*прихрамывать*) бер аҙ аҡһау, туйтаңлау, аҡһаҡлау; **припада́ть на одну́ но́гу** бер аяҡҡа аҡһаҡлау

**ПРИПА́ДОК** *м* **1.** быума, өйәнәк, һуғылма; **серде́чный припа́док** йөрәк өйәнәге **2.** *чего* ярһыу; **припа́док гне́ва** асыу ярһыуы

**ПРИПА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** быума сирле, быумалы, өйәнәкле **2.** *в знач. сущ.* **припа́дочный** *м* и **припа́дочная** *ж* быума сирле кеше, өйәнәкле кеше

**ПРИПА́ИВАТЬ** *несов. см.* **припая́ть**

**ПРИПА́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **припая́ть — припа́ивать** **2.** (*припаянная часть*) иретеп йәбештерелгән өлөш (урын)

**ПРИПА́РКА** *ж* **1.** боҫлама; **де́лать припа́рки** боҫлама ҡуйыу **2.** (*процедура*) боҫлама һалыу (ҡуйыу)

**ПРИПАСА́ТЬ** *несов. см.* **припасти́**

**ПРИПАСТИ́** *сов. что, чего*; *разг.* әҙерләү, әҙерләп ҡуйыу, алдан әҙерләү; **припасти́ дров на́ зиму** ҡышҡа утын әҙерләп ҡуйыу

**ПРИПА́СТЬ** *сов.* **1.** *к кому-чему, на что* (*опуститься*) сүгеү; **припа́сть на пере́дние ла́пы** алғы аяҡтарға сүгеү **2.** (*опустившись, наклонившись, прижаться*) һырығыу, һыйыныу, ятыу, терәү; **припа́сть к земле́** ергә һырығыу

**ПРИПА́СЫ** *мн.* (*ед.* **припа́с** *м*; *прост.*) **1.** аҙыҡ-түлек, ашамлыҡтар, ашамлыҡ-эсемлек **2.** (*принадлежности для какого-л. занятия*) кәрәк-яраҡтар; **охо́тничьи припа́сы** һунар кәрәк-яраҡтары **3.** (*снаряды, патроны и т.п.*) припастар, кәрәк-яраҡтар; **боевы́е припа́сы** һуғыш припастары (*туп, патрон һ.б.*)

**ПРИПА́ХИВАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *чем* (*слегка пахнуть*) еҫ киләңкерәү, аҙыраҡ еҫ сығыу, еҫе килеп тороу **2.** *без доп.* (*о портящихся продуктах*) еҫләнеү, еҫләнә (һаҫый) башлау; **мя́со припа́хивает** ит еҫләнә башлаған

**ПРИПАЯ́ТЬ** *сов. что* иретеп йәбештереү, ҡойоп йәбештереү; **припая́ть но́сик к ча́йнику** сәйнүк моронон иретеп йәбештереү

**ПРИПАЯ́ТЬСЯ** *сов.* иреп йәбешеү

**ПРИПЕ́В** *м* ҡушымта (*йырҙа*); **слова́ припе́ва** йыр ҡушымта һүҙҙәре

**ПРИПЕВА́ТЬ** *несов.*; *разг.* (аҡрын ғына) йырлау, көйләү (*ниҙер эшләгәндә*)

**ПРИПЕВА́ЮЧИ: жить припева́ючи** *разг.* рәхәт (мул, йырлап) йәшәү, муллыҡта йәшәү

**ПРИПЁК I** *м* **1.** ҡояш ҡыҙыуы, ҡояш ҡыҙҙырған урын, көн бите; **сиде́ть на припёке** ҡояш ҡыҙҙырған урында ултырыу **2.** (*зной*) эҫе, көн ҡыҙыуы

**ПРИПЁК II** *м* (*при выпечке хлеба*) артым, бешкәндә артыу (*ондоң икмәк итеп бешергәндән һуң ауырлығы артыу*); **дава́ть припёк** артым биреү

**ПРИПЁКА: сбо́ку припёка** *разг.* кәрәкле кишер япрағы (*кәрәкһеҙлек тураһында*)

**ПРИПЕКА́ТЬ** *несов. см.* **припе́чь**

**ПРИПЕРЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что, чем* терәтеү, терәтеп (текәтеп) ябыу (ҡуйыу); **припере́ть воро́та бревно́м** бүрәнә менән терәтеп ҡапҡа ябыу **2.** *кого-что* (*напирая, прижать*) терәлдереү, һырыҡтырыу, килтереп ҡыҫыу, тын алырға ирек бирмәү

**ПРИПЕЧА́ТАТЬ** *сов. что* **1.** (*добавить к напечатанному*) өҫтәп (өҫтәмә) баҫыу, өҫтәмә рәүештә баҫтырыу **2.** *разг.* (*закрывая, наложить печать*) мисәт һуғыу (баҫыу)

**ПРИПЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* (*о солнце*) ҡыҙҙырыу; **со́лнце припекло́** ҡояш ҡыҙҙыра **2.** *что*; *разг.* (*дать пригореть*) көйҙөрөү, көйҙөрөп ебәреү, утта артыҡ тотоу

**ПРИПИРА́ТЬ** *несов. см.* **припере́ть**

**ПРИПИСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*добавить к написанному*) өҫтәп яҙыу; **приписа́ть не́сколько строк** бер нисә юл өҫтәп яҙыу **2.** *кого-что* (*причислить*) яҙып беркетеү, беркетеү, теркәү, яҙып (теркәп) ҡуйыу; **приписа́ть к поликли́нике** поликлиникаға беркетеү **3.** *кому-чему, что* (*отнести на счёт кого-чего-л.*) тип иҫәпләү, япһарыу, -дан/-дән күреү; **приписа́ть оши́бку со́бственной невнима́тельности** иғтибарһыҙлығыңдың хатаһы тип иҫәпләү **4.** (*счесть принадлежащим кому-л.*) -ныҡы/-неке тип күрһәтеү, -ға/-гә ҡайтарып ҡалдырыу; **приписа́ть стихи́ друго́му а́втору** шиғырҙарҙы икенсе бер авторға ҡайтарып ҡалдырыу

**ПРИПИСА́ТЬСЯ** *сов.* яҙылыу, беркетелеү, яҙылып теркәлеү, теркәлеп ҡуйыу

**ПРИПИ́СКА** *ж* **1.** *см.* **приписа́ть — припи́сывать** 1, 2; **2.** (*дополнение к написанному*) өҫтәлмә яҙыу **3.** *обычно мн.* **припи́ски** (*заведомо ложные сведения в документах и т.п.*) өҫтәп (арттырып) яҙыу, ялған яҙмалар

**ПРИПИСНО́Й,** -ая, -ое *офиц.* **1.** ҡарамағына яҙылған (теркәлгән, беркетелгән) **2.** яҙылыу ...ы, теркәлеү ...ы; **приписно́е свиде́тельство** теркәлеү таныҡлығы

**ПРИПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **приписа́ть**

**ПРИПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приписа́ться** **2.** *страд. от* **припи́сывать**

**ПРИПЛА́ТА** *ж* **1.** *см.* **приплати́ть — припла́чивать** **2.** (*деньги*) өҫтәп түләнгән аҡса, өҫтәмә (хаҡ), өҫтәү; **больша́я припла́та** ҙур өҫтәү

**ПРИПЛАТИ́ТЬ** *сов. что* өҫтәп түләү (биреү), өҫтәү, биреү

**ПРИПЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **приплати́ть**

**ПРИПЛЕСТИ́** *сов.* **1.** *что* (*вплести*) ҡушып үреү; **приплести́ ле́нту к венку́** венокка таҫма ҡушып үреү **2.** *кого-что*; *перен., прост.* араға ҡыҫтырыу, ҡыҫтырылып әйтеү (һөйләү), килтереп ҡыҫтырыу; **приплести́ и́мя** *чьё-л. кемдеңдер* исемен килтереп ҡыҫтырыу

**ПРИПЛЕСТИ́СЬ** *сов.*; *разг.* (*с трудом прийти*) көс-хәл менән (көскә-көскә) килеп етеү, тырышып-тырмашып барып етеү

**ПРИПЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **приплести́**

**ПРИПЛО́Д** *м* **1.** үрсем, түл; **приноси́ть припло́д** үрсем биреү **2.** *собир.* йәш мал; **выра́щивать припло́д** йәш малды үҫтереү (тәрбиәләү, ҡарау)

**ПРИПЛЫВА́ТЬ** *несов. см.* **приплы́ть**

**ПРИПЛЫ́ТЬ** *сов.* (*достичь какого-л. места вплавь*) йөҙөп килеү (килеп етеү); (*на лодке и т.п.*) килеп етеү, йөҙөп барып етеү

**ПРИПЛЮ́СНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **приплю́снуть 2.** *прил.* йәйпәк, йәмшек, ялпаҡ, йәмшәйгән, йәнселгән; **приплю́снутый нос** йәмшек танау

**ПРИПЛЮ́СНУТЬ** *сов. что* йәмшәйтеү, ялпайтыу, йәнсеү

**ПРИПЛЮСОВА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* (*һанағанда, иҫәптә*) ҡушыу, өҫтәү

**ПРИПЛЮСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **приплюсова́ть**

**ПРИПЛЮ́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **приплю́щить**

**ПРИПЛЮ́ЩИТЬ** *сов. см.* **приплю́снуть**

**ПРИПЛЯ́СЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* бейей-бейей барыу (йөрөү), бейегәндәй аяҡты тыпырлатыу

**ПРИПОДНИМА́ТЬ** *несов. см.* **приподня́ть**

**ПРИПОДНИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приподня́ться 2.** *страд. от* **приподнима́ть**

**ПРИПО́ДНЯТОСТЬ** *ж* күтәренкелек, танталалылыҡ; **припо́днятость настрое́ния** кәйеф күтәренкелеге

**ПРИПО́ДНЯТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **приподня́ть 2.** *прил.* (*радостно возбуждённый*) күтәренке; **припо́днятое настрое́ние** күтәренке кәйеф **3.** *прил.* (*торжественный*) ҡупшы, танталалы; **припо́днятый стиль** ҡупшы стиль

**ПРИПОДНЯ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (бер аҙ) күтәреү, күтәрә төшөү (биреү), ҡалҡытыу, күтәрә биреү; **приподня́ть ша́пку** бүректе ҡалҡытыу; **приподня́ть бревно́** бүрәнәне күтәреү **2.** *перен.* (*оживить*) күтәрә төшөү ♦ **приподня́ть заве́су**; **приоткры́ть заве́су** серҙе аса биреү (төшөү)

**ПРИПОДНЯ́ТЬСЯ** *сов.* күтәрелә төшөү, бер аҙ күтәрелеү, ҡалҡыныу; **чуть приподня́ться** ҡалҡына биреү

**ПРИПО́Й** *м*; *тех.* йәбештергес иретмә (*металды иретеп йәбештергәндә ҡулланыла*)

**ПРИПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **приползти́**

**ПРИПОЛЗТИ́** *сов.* шыуып (шыуышып) килеп етеү, имгәкләп (һөйрәлеп, дүрт тағанлап) килеп етеү

**ПРИПОЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое Поляр түңәрәк (ҡотоп) тирәһендәге; **приполя́рные райо́ны** Поляр түңәрәк тирәһендәге райондар

**ПРИПОМИНА́ТЬ** *несов. см.* **припо́мнить** 1, 2

**ПРИПОМИНА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **припо́мниться 2.** *страд. от* **припомина́ть**

**ПРИПО́МНИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*вспомнить*) иҫкә төшөрөү, хәтергә төшөрөү (кисектереү), хәтерләү **2.** *кого-что* (*узнать*) таныу, төҫмөрләү **3.** *что, кому*; *разг.* (*отомстить*) иҫенә төшөрөү, хәтерләтеү (*үс алыу менән янағанда*); **я тебе́ э́то припо́мню** мин быны иҫеңә төшөрөрмөн әле

**ПРИПО́МНИТЬСЯ** *сов.* иҫкә төшөү, хәтергә килеү (төшөү)

**ПРИПРА́ВА** *ж* аш тәмләткес (*һуған, борос, ҡәнәфер һ.б.*)

**ПРИПРА́ВИТЬ** *сов. что, чем* **1.** (*положить приправу*) ҡатыу, аш тәмләткес һалыу, тәмләндереү **2.** *типогр.* баҫым яһап ҡабартыу (*хәреф-тәрҙе*)

**ПРИПРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **припра́вить**

**ПРИПРЫ́ГАТЬ** *сов.*; *разг.* һикергеләп (һикерә-һикерә) килеп етеү

**ПРИПРЫ́ГИВАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *см.* **припры́гать, припры́гнуть 2.** ырғанлау, һикерәнләү, һикереп-һикереп алыу, һикергеләү

**ПРИПРЫ́ГНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*подпрыгнуть*) һикереү **2.** (*прыгая, приблизиться*) һикереп (һикерә-һикерә) килеп етеү

**ПРИПРЯГА́ТЬ** *несов. см.* **припря́чь**

**ПРИПРЯ́ТАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* йәшереү, йәшереп ҡуйыу

**ПРИПРЯ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **припря́тать**

**ПРИПРЯ́ЧЬ** *сов. кого* ҡушып (мисәп) егеү, мисәү(гә) егеү, мисәүләү; **припря́чь ло́шадь** ат мисәүләү

**ПРИПУ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **припугну́ть**

**ПРИПУГНУ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡурҡытыу, өркөтөү, ҡурҡытып (өркөтөп) алыу

**ПРИПУ́ДРИВАТЬ** *несов. см.* **припу́дрить**

**ПРИПУ́ДРИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **припу́дриться 2.** *страд. от* **припу́дривать**

**ПРИПУ́ДРИТЬ** *сов. что* саҡ ҡына һибеү, аҙыраҡ кершән (пудра) һөртөү; **припу́дрить ра́ну лека́рственным порошко́м** яраға саҡ ҡына дарыу онтағы һибеү

**ПРИПУ́ДРИТЬСЯ** *сов.* саҡ ҡына кершән (пудра) һөртөнөү

**ПРИПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **припусти́ть**

**ПРИПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, к кому-чему*; *прост.* (*подпустить*) ҡушыу, ебәреү; **припусти́ть лошаде́й к овсу́** аттарҙы һолоға ҡушыу **2.** *кого*; *спец.* (*допустить к случке*) ҡаплатыу, ҡушыу, ҡасырыу (*малды*) **3.** *кого-что* и *без доп.*; *разг.* (*погнать*) шәбәйтеү, ҡыуа төшөү, тиҙләтеү; **припусти́ть коня́** атты ҡыуа төшөү **4.** *разг. см.* **припусти́ться 5.** *разг.* (*о дожде*) көсәйеү, шәбәйеү, көсәйә төшөү **6.** *что* и *без доп.*; *спец.* (*прибавить в размерах при раскрое*) оҙонайтыу, оҙайтыу, оҙайта төшөү; **припусти́ть рукава́ на сантиме́тр** еңдәрҙе бер сантиметрға оҙайта төшөү

**ПРИПУСТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡыҙыуыраҡ йүгерә (саба) башлау

**ПРИПУ́ТАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ғәйепһеҙгә бутау, нахаҡҡа ғәйепләү (*берәй эшкә*)

**ПРИПУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **припу́тать**

**ПРИПУХА́ТЬ** *несов. см.* **припу́хнуть**

**ПРИПУ́ХЛОСТЬ** *ж* шешкәнлек, ҡабарғанлыҡ, шешенеү; **припу́хлость ве́ка** күҙ ҡабағының шешенеүе

**ПРИПУ́ХЛЫЙ,** -ая, -ое шешенке, шешмәк, ҡабарған, ҡабарынҡы, ҡабарып торған; **припу́хлое лицо́** шешенке бит; **припу́хлые гу́бы** ҡабарынҡы ирендәр

**ПРИПУ́ХНУТЬ** *сов.* аҙыраҡ (бер аҙ) шешеү, шешеп тороу, шешмәкләнеү, ҡабарыу, ҡабарып сығыу; **щека́ припу́хла** яңаҡ шешмәкләнгән

**ПРИРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **прирабо́тать**

**ПРИРАБО́ТАТЬ** *сов. что, чего; разг.* өҫтә(л)мә (өҫтәп) эшләп алыу (эшләү); **прирабо́тать де́нег** өҫтәмә аҡса эшләү

**ПРИ́РАБОТОК** *м* өҫтә(л)мә аҡса (*төп эш хаҡынан тыш эшләп алынған*)

**ПРИРА́ВНИВАТЬ I** *несов. см.* **приравня́ть**

**ПРИРА́ВНИВАТЬ II** *несов. см.* **прировня́ть**

**ПРИРА́ВНИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **приравня́ться 2.** *страд. от* **прира́внивать** I

**ПРИРА́ВНИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **прира́внивать** II

**ПРИРАВНЯ́ТЬ** *сов. кого-что, к кому-чему* (*уподобить, сделать равным*) тиңләштереү, типтиң (бер төрлө) итеү

**ПРИРАВНЯ́ТЬСЯ** *сов.* тиңләшеү, тиң (бер иш) булыу

**ПРИРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **прирасти́**

**ПРИРАСТИ́** *сов.* **1.** *к чему* (*срастись*) йәбешеп (ҡушылып) үҫеү (үҫеп китеү, уңалыу) **2.** *к чему; перен.* (*остаться неподвижным*) йәбешеп (ҡатып) ҡалыу; **но́ги приросли́ к по́лу** аяҡтар иҙәнгә йәбешеп ҡалды **3.** (*увеличиваться в количестве*) үҫеү, артыу, күбәйеү, ишәйеү

**ПРИРАСТИ́ТЬ** *сов. что* йәбештереп үҫтереү, ҡушыу

**ПРИРАЩА́ТЬ** *несов.; уст. см.* **прирасти́ть**

**ПРИРАЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **прирасти́, прирасти́ть — прираща́ть; приращéние черенка́** сыбыҡсаның йәбешеп үҫеп китеүе **2.** (*увеличение, прибавление*) үҫеү, артыу, өҫтәлеү, ҡушыу; **приращéние насле́дственных доле́й** *юр.* мираҫ өлөштәрен ҡушыу **3.** *мат.* ҡушымта; **приращéние аргуме́нта фу́нкции** функция аргументының ҡушымтаһы

**ПРИРА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **прирасти́ть**

**ПРИРЕВНОВА́ТЬ** *сов. кого* көнләшеү, көнләшә (көнләй) башлау

**ПРИРЕ́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что; разг.* (*убить на мясо*) салыу, һуйыу, боғаҙлау **2.** *что, чего* (*прибавить — о земле*) ер ҡырҡып ҡушыу (алыу, баҫып алыу); **прире́зать уча́сток к огоро́ду** йәшелсә баҡсаһына ер ҡырҡып (бүлеп алып) ҡушыу **3.** *кого; разг.* (*зарезать всех, многих*) һуйыу, һуйып бөтөрөү

**ПРИРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **прире́зать**

**ПРИРЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое йылға буйындағы (янындағы, эргәһендәге)

**ПРИРОВНЯ́ТЬ** *сов. что* тигеҙләү, тигеҙ итеү, тигеҙләп сығыу; **прировня́ть до́ски по́ла** иҙән таҡталарын тигеҙләү

**ПРИРО́ДА** *ж* **1.** тәбиғәт, сәхрә; **приро́да меня́ется** тәбиғәт алмашына; **мир приро́ды** тәбиғәт донъяһы; **изуча́ть приро́ду** тәбиғәтте өйрәнеү; **явле́ния приро́ды** тәбиғәт күренештәре; **на ло́не приро́ды** тәбиғәт ҡосағында; **отдыха́ть на приро́де** сәхрәлә ял итеү, сәхрәләү, сәхрә сигеү **2.** (*сущность*) тәбиғәт(е), асыл(ы), нигеҙ; **приро́да све́та** яҡтылыҡтың тәбиғәте **3.** *разг.* (*прирождённое свойство, характер*) тәбиғәт, холоҡ, булмыш; **по приро́де она́ до́брая** тәбиғәте менән ул йомшаҡ кеше ♦ **в приро́де веще́й** ғәҙәти, ғәҙәттә була торған; **от приро́ды** тыумыштан

**ПРИРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое, **1.** (*естественный*) тәбиғи; **приро́дные бога́тства** тәбиғи байлыҡ; **приро́дный газ** тәбиғи газ; **приро́дные усло́вия** тәбиғи шарттар **2.** (*врождённый*) тәбиғи, тыумыштан булған, ысын; **приро́дный ум** тыумыштан булған аҡыл **3.** (*принадлежащий по рождению*) тыумыштан, булмыштан килгән

**ПРИРОДОВЕ́ДЕНИЕ** *с* тәбиғәт белеме (ғилеме), тәбиғәтте өйрәнеү; **уро́к природове́дения** тәбиғәтте өйрәнеү дәресе

**ПРИРОЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*врождённый*) тәбиғи, тыумыштан килгән (булған, ҡалған); **прирождённый тала́нт** тыумыштан килгән һәләтлек **2.** (*подлинный*) ысын, булмышы менән; **она́ прирождённый педаго́г** ул булмышы менән педагог

**ПРИРО́СТ** *м* үҫеш, артым, артыу; **приро́ст урожа́я** уңыштың үҫеүе; **коли́чественный приро́ст** һан яғынан артыу; **абсолю́тный приро́ст населе́ния** халыҡ һанының абсолют үҫеше

**ПРИРУЧА́ТЬ** *несов. см.* **приручи́ть**

**ПРИРУЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приручи́ться 2.** *страд. от* **прируча́ть**

**ПРИРУЧЕ́НИЕ** *с см.* **приручи́ть — прируча́ть, приручи́ться — прируча́ться; занима́ться прируче́нием птиц** ҡоштарҙы ҡулға эйәләштереү менән шөғөлләнеү

**ПРИРУЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡулға эйәләштереү (өйрәтеү, илектереү); **приручи́ть ди́ких живо́тных** ҡырағай йәнлектәрҙе илектереү **2.** *разг.* (*сделать послушным*) (үҙенә) эйәләштереү, йәлеп итеү

**ПРИРУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡулға өйрәнеү (эйәләшеү), илегеү, эйегеү; **ёж прируча́ется бы́стро** терпе ҡулға тиҙ илегә **2.** *разг.* (*стать послушным*) эйәләшеү

**ПРИСВА́ИВАТЬ** *несов. см.* **присво́ить**

**ПРИ́СВИСТ** *м* **1.** (*свист, сопровождающий что-л.*) һыҙғырыу, һыҙғырыныу; **петь с при́свистом** һыҙғырынып йырлау **2.** (*свистящий призвук*) һыҙғырыҡ тауыш, шыйылдау; **дыша́ть с при́свистом** шыйылдап тын алыу

**ПРИСВИ́СТНУТЬ** *сов.* һыҙғырыу, һыҙғырып ҡуйыу

**ПРИСВИ́СТЫВАТЬ** *несов.* **1.** (*посвистывать*) һыҙғырыныу, һыҙғырғылау **2.** (*говорить, дышать с присвистом*) шыйылдап (шыйлап) һөйләшеү (тын алыу)

**ПРИСВОЕ́НИЕ** *с см.* **присво́ить**; **присвое́ние чужо́го иму́щества** кеше мөлкәтен үҙләштереү; **присвое́ние почётного зва́ния** хөрмәтле (маҡтаулы) исем биреү

**ПРИСВО́ИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*завладеть чужим*) үҙләштереү, үҙенеке итеү; **присва́ивать чужу́ю мысль** кеше фекерен үҙләштереү; **присва́ивать нахо́дку** табышты үҙләштереү **2.** *что, кому-чему* исем (дәрәжә) биреү; **присво́ить зва́ние наро́дного арти́ста** халыҡ артисы исеме биреү

**ПРИСЕДА́НИЕ** *с см.* **приседа́ть**

**ПРИСЕДА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **присе́сть** 1; **2.** (*подгибать колени при ходьбе*) атлағанда сүгәләп китеү

**ПРИСЕМЯ́ННИК** *м*; *бот.* орлоҡ ҡолаҡсыны

**ПРИСЕ́СТ: за оди́н присе́ст**; **в оди́н присе́ст** *разг.* бер ултырыуҙа, бер юлы

**ПРИСЕ́СТЬ** *сов.* **1.** (*опуститься*) сүгәләү, сүкәйеү; **присе́сть на ко́рточки** сүгәләп ултырыу **2.** (*сесть*) ултырып алыу, (аҙ ғына ваҡытҡа) ултырыу; **присе́сть на стул** ултырғысҡа ултырыу

**ПРИ́СКАЗКА** *ж*; *фольк.* экиәт башы (*экиәттең инеш өлөшө*)

**ПРИСКАКА́ТЬ** *сов.* **1.** (*приехать на лошади вскачь*) саптырып килеү, саптырып (сабып) килеп етеү (*атта*); **прискака́ть верхо́м** һыбай сабып килеп етеү **2.** (*припрыгать*) һикергеләп килеп етеү, һикерәнләп (ырғанлап) килеү **3.** *разг.* (*быстро прибыть*) бик тиҙ килеү, сабып (елеп) килеп етеү

**ПРИСКО́РБИЕ** *с*; *уст.* үкенес, ҡайғы, әсенеү ♦ **к (глубо́кому) приско́рбию** үкенескә ҡаршы; **с (глубо́ким) приско́рбием** тәрән ҡайғы менән

**ПРИСКО́РБНЫЙ,** -ая, -ое ҡайғылы, үкенесле, хәсрәтле; **приско́рбное собы́тие** ҡайғылы ваҡиға; **приско́рбная судьба́** үкенесле яҙмыш

**ПРИСКУ́ЧИТЬ** *сов.*; *разг.* ялҡытыу, туйҙырып бөтөү; **жизнь в го́роде прискучила** ҡалалағы тормош ялҡытты

**ПРИСЛА́ТЬ** *сов. кого-что, чего* ебәреү, ебәреп (тороу) ҡуйыу, һалыу; **присла́ть де́ньги** аҡса һалыу; **присла́ть пода́рок** бүләк ебәреү

**ПРИСЛО́ВЬЕ** *с*; *разг.* мәҙәк әйтем, тапҡыр һүҙ

**ПРИСЛОНИ́ТЬ** *сов. кого-что, к чему* һөйәү, терәтеү, һөйәп ҡуйыу, терәтеп ҡуйыу, һөйкәү, терәү, терәп ҡуйыу; **прислони́ть к забо́ру** ҡоймаға һөйәү; **прислони́ть к сто́гу** кәбәнгә һөйкәү

**ПРИСЛОНИ́ТЬСЯ** *сов.* һөйәлеү, терәлеү, һөйәлеп тороу; **прислони́ться спино́й** арҡа менән һөйәнеү

**ПРИСЛОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **прислони́ть**

**ПРИСЛОНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прислони́ться 2.** *страд. от* **прислоня́ть**

**ПРИСЛУ́ГА** *ж* **1.** (*служанка*) аҫрау, хеҙмәтсе ҡатын; **забо́тливая прислу́га** хәстәрле хеҙмәтсе ҡатын **2.** *собир.*; *уст.* (*слуги*) хеҙмәтселәр, ялсылар **3.** *собир.*; *воен.* команда, расчёт; **пулемётная прислу́га** пулемёт расчёты

**ПРИСЛУ́ЖИВАТЬ** *несов.* **1.** *кому* хеҙмәтсе булып тороу, йомош-юлға йөрөү **2.** *разг.* (*оказывать услуги*) булышлыҡ итеү, ярҙам күрһәтеү (итеү)

**ПРИСЛУ́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* ярамһаҡланыу, ҡуштанланыу, ярарға тырышыу, ялағайланыу

**ПРИСЛУ́ЖНИК** *м* и **ПРИСЛУ́ЖНИЦА** *ж* **1.** *уст.* (*слуга*) хеҙмәтсе, аҫрау; **держа́ть прислу́жника** хеҙмәтсе тотоу **2.** *разг.* ҡуштан, ялағай

**ПРИСЛУ́ШАТЬСЯ** *сов. к кому-чему* и *без. доп.* **1.** тыңлап тороу, ҡолаҡ һалыу; **прислу́шаться к шо́роху** ҡыштырлаған тауышҡа ҡолаҡ һалыу **2.** иғтибар итеү, иғтибарға алыу, ҡолаҡ һалыу; **прислу́шаться к го́лосу наро́да** халыҡ һүҙен иғтибарға алыу; **не прислу́шаться к сове́там** кәңәшкә ҡолаҡ һалмау **3.** *разг.* (*привыкнув к звукам, не замечать их*) эйәләшеп (күнегеп) бөтөү, күнегеү; **прислу́шаться к шу́му у́лицы** урамдағы шау-шыуға күнегеп бөтөү

**ПРИСЛУ́ШИВАТЬСЯ** *несов. см.* **прислу́шаться** 1, 2

**ПРИСМА́ТРИВАТЬ** *несов. см.* **присмотре́ть**; **присма́тривать себе́ рабо́ту** үҙеңә эш эҙләү; **присма́тривать ко́мнату** бүлмә ҡараштырыу

**ПРИСМА́ТРИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **присмотре́ться 2.** *страд. от* **присма́тривать**

**ПРИСМИРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*стать смирным*) тынысланыу, йыуашланыу, тыйнаҡланыу; **де́ти присмире́ли** балалар тынысланды **2.** (*примолкнуть*) тынып ҡалыу, тыныу, баҫылыу

**ПРИСМО́ТР** *м см.* **присмотре́ть** — **присма́тривать** 1; **быть под присмо́тром** күҙәтеү аҫтында булыу; **оста́вить без присмо́тра** ҡарауһыҙ ҡалдырыу

**ПРИСМОТРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *за кем-чем* ҡарау, бағыу, бағауыллау, ҡарап тороу, ҡараштырыу, күҙәтеү, күҙ-ҡолаҡ булыу; **присмотре́ть за детьми́** балаларҙы ҡарау; **присмотре́ть за до́мом** йортто ҡарап тороу **2.** *кого-что*; *разг.* (*подыскать, наметить*) ҡарап ҡуйыу, эҙләү, һайлау, күҙләү; **присмотре́ть неве́сту** ҡыҙ күҙләү

**ПРИСМОТРЕ́ТЬСЯ** *сов. к кому-чему* и *без доп.* **1.** (*внимательно всмотреться*) текәлеп ҡарау, ентекләп (ныҡлап) ҡарау **2.** (*наблюдая, понять*) иғтибар менән күҙәтеү, аңлау **3.** (*привыкнуть, освоиться*) танышыу, ҡарап өйрәнеү, өйрәнеп бөтөү; **присмотре́ться к де́лу** эш менән танышыу; **присмотре́ться в темноте́** ҡараңғыға күҙ өйрәнеү

**ПРИСНИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **сни́ться**

**ПРИСОВОКУПИ́ТЬ** *сов. что*; *книжн.* **1.** (*присоединить*) ҡушыу, беркетеү, теркәү; **присовокупи́ть доку́мент к де́лу** документты эшкә теркәп ҡуйыу **2.** *уст.* (*сказать в добавление*) өҫтәп әйтеү

**ПРИСОВОКУПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **присовокупи́ть**

**ПРИСОЕДИНЕ́НИЕ** *с см.* **присоедини́ть — присоединя́ть**, **присоедини́ться — присоединя́ться**; **присоедине́ние Башкортоста́на к Росси́и** Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуы

**ПРИСОЕДИНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тоташтырыусы …ы, тоташтыра торған, тоташтырғыс; **присоедини́тельная цепь** тоташтыра торған сынйыр **2.** *грам.* бәйләүсе; **присоедини́тельный сою́з** бәйләүсе теркәүес

**ПРИСОЕДИНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*соединить*) ҡушыу, берләштереү, беректереү **2.** *эл.* (*подключить*) тоташтырыу, тоташтырып ҡуйыу, ялғау; **присоедини́ть провода́** сымдарҙы тоташтырыу **3.** *кого-что* (*причислить к кому-чему-л.*) ҡушып иҫәпләү, өҫтәп иҫәпләү, ҡушыу; **присоедини́ть райо́н к друго́й о́бласти** районды икенсе бер өлкәгә ҡушыу

**ПРИСОЕДИНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡушылыу, эйәреү; **присоедини́ться к толпе́** халыҡ төркөмөнә эйәреү; **коро́ва присоедини́лась к ста́ду** һыйыр көтөүгә ҡушылды **2.** (*стать на чью-л. сторону*) ҡушылыу, яғын алыу; **присоедини́ться к мне́нию** *чьему-л. кемдеңдер* фекеренә ҡушылыу

**ПРИСОЕДИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **присоедини́ть**

**ПРИСОЕДИНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **присоедини́ться 2.** *страд. от* **присоединя́ть**

**ПРИСОСА́ТЬСЯ** *сов.* йәбешеп һурыу, ҡаҙалыу; **пия́вка присоса́лась к ноге́** һөлөк аяҡҡа ҡаҙалды

**ПРИСОСЕ́ДИТЬСЯ** *сов. к кому-чему*; *разг.* йәнәш ултырыу, күрше булыу

**ПРИСО́СКА** ж и **ПРИСО́СОК** *м* имгес, һурғыс

**ПРИСО́ХНУТЬ** *сов.* йәбешеп кибеү

**ПРИСПЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* (*настать — о времени*) килеү, (килеп) етеү; **приспе́ло вре́мя е́хать** китергә ваҡыт килеп етте

**ПРИСПЕ́ШНИК** *м* и **ПРИСПЕ́ШНИЦА** *ж*; *книжн.* ҡуштан, ярҙамсы (булышсы); **быть приспе́шником** *чьим-л. кемдеңдер* ҡуштаны булыу

**ПРИСПИ́ЧИТЬ** *сов. кому безл.*; *прост.* ҡыҫталыу

**ПРИСПОСА́БЛИВАТЬ** *несов. см.* **приспосо́бить**

**ПРИСПОСА́БЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приспосо́биться 2.** *страд. от* **приспоса́бливать**

**ПРИСПОСО́БИТЬ** *сов. кого-что* ярараштырыу, уңайлаштырыу, ҡулайлаштырыу; **приспосо́бить зда́ние под шко́лу** бинаны мәктәпкә яраҡлаштырыу

**ПРИСПОСО́БИТЬСЯ** *сов.* яраҡлашыу, ҡулайлашыу, йайлашыу, күнегеү; **приспосо́биться к но́вым усло́виям** яңы шарттарға яраҡлашыу; **приспосо́биться к распоря́дку дня** көн тәртибенә күнегеү

**ПРИСПОСОБЛЕ́НЕЦ** *м*; *презр.* аумаҡай (кеше), яраҡлашыусы (*ике йөҙлө кеше*)

**ПРИСПОСОБЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **приспосо́бить — приспособля́ть**, **приспосо́биться — приспособля́ться**; **приспособле́ние к усло́виям** шарттарға яраҡлашыу **2.** (*прибор*, *механизм*) йайланма, ҡорал, ҡулайлама; **но́вое приспособле́ние к станку́** станокка яңы йайланма

**ПРИСПОСО́БЛЕННОСТЬ** *ж* яраҡлашыу, йайлашҡанлыҡ, ярашыу; **приспосо́бленность органи́зма к окружа́ющей среде́** организмдың мөхиткә яраҡлашыуы; **недоста́точная приспосо́бленность к жи́зни** тормошҡа тейешенсә яраҡлашмау

**ПРИСПОСОБЛЕ́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *презр.* йайлашыу …ы, ярамһаҡ, йайлашыусы(лар) …ы; **приспособле́нческая поли́тика** йайлашыу сәйәсәте

**ПРИСПОСОБЛЕ́НЧЕСТВО** *с*; *презр.* йайлашыусылыҡ, яраҡлашыу

**ПРИСПОСОБЛЯ́ЕМОСТЬ** *ж* йайлаша (күнегә) алыу, яраҡлашыусан булыу; **приспособля́емость органи́зма к окружа́ющей среде́** организмдың мөхиткә яраҡлашыусан булыуы

**ПРИСПОСОБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **приспосо́бить**

**ПРИСПОСОБЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приспосо́биться 2.** *страд. от* **приспособля́ть**

**ПРИСПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **приспусти́ть**

**ПРИСПУСТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*немного опустить*) аҙыраҡ төшөрөү, төшөрә биреү; **приспусти́ть флаг** флагты төшөрә биреү **2.** (*убавить*) баҫыу, кәметә төшөү (биреү); **приспусти́ть температу́ру котла́** ҡаҙандың ҡыҙыулығын кәметә төшөү

**ПРИСПУСТИ́ТЬСЯ** *сов.* бер аҙ (аҙыраҡ) төшөү (кәмеү)

**ПРИ́СТАВ** *м* пристав (*революцияға тиклем Рәсәйҙә урындағы полиция офицеры*) ♦ **суде́бный при́став** суд приставы

**ПРИСТАВА́ТЬ** *несов. см.* **приста́ть** 1—5, 7

**ПРИСТА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*придвинуть*) (янына) ҡуйыу, терәп (терәтеп) ҡуйыу; **приста́вить стул к столу́** ултырғысты өҫтәлгә терәп ҡуйыу **2.** (*прислонить*) терәү, һөйәү, терәп (һөйәп) ҡуйыу; **приста́вить ле́стницу к стене́** баҫҡысты стенаға һөйәп (терәп) ҡуйыу **3.** *что* (*пришить*, *удлиняя*) ялғау, ялғап тегеү, ялғап оҙонайтыу **4.** *кого-что*; *разг.* (*для надзора*, *ухода*) ҡарарға ҡуйыу, күҙ-колаҡ булырға билдәләү

**ПРИСТА́ВКА** *ж* **1.** *см.* **приста́вить — приставля́ть** 3; **2.** ҡушылма (*берәй нәмәгә ҡушылып ҡуйылған нәмә*); **приста́вка к фотока́мере** фотокамера ҡушылмаһы **3.** *грам.* приставка

**ПРИСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **приста́вить**

**ПРИСТАВНО́Й,** -ая, -ое өҫтәп (ҡушып) ҡуйылған, (өҫтәп, терәп) һөйәп ҡуйылмалы, һөйәп (өҫтәп, терәп) ҡуйылған; **приставна́я ле́стница** һөйәп ҡуйылмалы баҫҡыс; **приставны́е места́** өҫтәмә ултырғыстар

**ПРИСТА́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* приставка, приставкалы; **приста́вочные глаго́лы** приставкалы ҡылымдар

**ПРИ́СТАЛЬНЫЙ,** -ая, -ое теклəп (төбәп, иғтибар менән) ҡараған, текәлгән; **при́стальный взгляд** текәлгән ҡараш

**ПРИСТА́НИЩЕ** *с* һыйыныр урын, торор (керер) урын, төйәк; **быть приста́нищем** төйәк булыу; **выбира́ть себе́ приста́нище** үҙенә төйәк һайлау

**ПРИСТАНЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое (тимер юл) станцияһы янындағы, станция ...ы; **пристанцио́нная у́лица** станция урамы

**ПРИ́СТАНЬ** *ж* **1.** пристань, туҡталыш (*ярға туҡтау урыны*); **морска́я при́стань** диңгеҙ пристане; **стоя́ть у при́стани** пристандә тороу **2.** *см.* **приста́нище**

**ПРИСТА́ТЬ** *сов.* **1.** *к кому-чему* (*прилипнуть*) йәбешеү, һылашыу, һыланыу, йоғоу; **грязь пристаёт** бысраҡ йоға **2.** *к кому*; *разг.* (*о болезни*) эләгеү, эләктереү, йоғоу, йоҡтороу **3.** *к кому*; *разг.* (*начать надоедать*) бәйләнеү, йөҙәтеү, бәйләнеп йөҙәтеү (теңкәгә тейеү); **приста́ть с про́сьбами** үтенестәр менән йөҙәтеү; **приста́ть к же́нщине** ҡатын-ҡыҙға бәйләнеү **4.** *к кому-чему*; *разг.* (*присоединиться, последовать*) эйәреү, һарылыу; **ко мне приста́ла соба́ка** миңә эт эйәрҙе **5.** *к чему* (*причалить*) ярға килеп туҡтау **6.** *кому-чему безл.* (*обычно с отрицанием*); *разг.* килешеү; **вам не приста́ло так говори́ть** былай һөйләү һеҙгә бер ҙә килешмәй **7.** *обл.* (*устать, утомиться*) талсығыу, йонсоу; **ло́шади приста́ли** аттар йонсоно ♦ **как ба́нный лист приста́ть** *см.* **ба́нный**; **приста́ть с ножо́м к го́рлу** *см.* **го́рло**

**ПРИСТЕГА́ТЬ** *сов. что* үтәнән-үтә сәнсеп тегеү, һырыу, эре-эре сәнсеп тегеү, типсеү, күбеү, типсеп (эләктереп) сығыу; **пристега́ть подкла́дку** эслекте типсеп ҡуйыу

**ПРИСТЁГИВАТЬ I** *несов. см.* **пристега́ть**

**ПРИСТЁГИВАТЬ II** *несов. см.* **пристегну́ть**

**ПРИСТЁГИВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **пристёгивать** I

**ПРИСТЁГИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **пристегну́ться 2.** *страд. от* **пристёгивать** II

**ПРИСТЕГНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*прикрепить, застёгивая*) эләктереү, ҡаптырыу, элеү; **пристегну́ть воротни́к соро́чки** күлдәк яғаһын эләктереү **2.** *кого-что*; *разг.* (*припрячь — о лошади*) ҡушып (мисәп) егеү, мисәүләү

**ПРИСТЕГНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** эләнеү, ҡаптырылыу, эләктерелеү; **воротничо́к пристегну́лся** яға ҡаптырылды; **пристегну́ться ремня́ми к кре́слу** ҡайыш менән креслоға ҡаптырылыу **2.** (*присоединиться к кому-чему-л.*) ҡушылып китеү, бәйләнеү

**ПРИСТЕЖНО́Й,** -ая, -ое эләктереп (ҡаптырып) ҡуйыла торған, эләктермәле; **пристежно́й воротни́к** эләктермәле яға

**ПРИСТО́ЙНОСТЬ** *ж* әҙәплелек, тәрбиәлелек, тәүфиҡлылыҡ; **присто́йность посту́пка** ҡылыҡтың әҙәплелеге

**ПРИСТО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое әҙәпле, тәрбиәле, үҙен тота белгән, тәүфиҡлы; **присто́йное сло́во** әҙәпле һүҙ

**ПРИСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **пристро́ить**

**ПРИСТРА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пристро́иться 2.** *страд. от* **пристра́ивать**

**ПРИСТРА́СТИЕ** *с* **1.** (*сильная склонность*) һәүәҫлек, ихласлыҡ, дәрт, мауығыу, ҡомар; **пристра́стие к му́зыке** музыкаға һәүәҫлек; **принима́ться с пристра́стием** ҡомар менән тотоноу **2.** (*предвзятое отношение*) ғәҙел булмау (ҡарамау), бер яҡлылыҡ ♦ **с пристра́стием** ентекләп, ҙур иғтибар менән

**ПРИСТРАСТИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡомарландырыу, әүәҫләндереү, мауыҡтырыу, дәртләндереү, ҡыҙыҡтырыу; **пристрасти́ть к чте́нию** (китап) уҡырға әүәҫләндереү

**ПРИСТРАСТИ́ТЬСЯ** *сов. к чему* ҡомарланыу, әүәҫләнеү, бирелеү, һалышыу; **пристрасти́ться к охо́те** һунарға ҡомарланыу

**ПРИСТРА́СТНОСТЬ** *ж* мауығыусанлыҡ, бер яҡлылыҡ, ғәҙелһеҙлек, ғәҙел булмау

**ПРИСТРА́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мауыға торған, иҫе киткән **2.** ғәҙелһеҙ, ғәҙеллекһеҙ, бер яҡлы; **пристра́стный челове́к** ғәҙеллекһеҙ кеше; **пристра́стное мне́ние** бер яҡлы фекер

**ПРИСТРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **пристрочи́ть**

**ПРИСТРЕ́ЛИВАТЬ I** *несов. см.* **пристрели́ть**

**ПРИСТРЕ́ЛИВАТЬ II** *несов. см.* **пристреля́ть**

**ПРИСТРЕ́ЛИВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **пристре́ливать** I

**ПРИСТРЕ́ЛИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **пристреля́ться 2.** *страд. от* **пристре́ливать** II

**ПРИСТРЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* атып үлтереү

**ПРИСТРЕ́ЛКА** *ж* һынау атышы, көйләү өсөн атыу, атып ҡарау (*мылтыҡтың атышын дөрөҫләү*)

**ПРИСТРЕЛЯ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*установить правильный прицел*) прицелды дөрөҫләү (билдәләү), (ҡоралды) сәпкә йүнәлтеү (тоҫҡау) **2.** атып һынап ҡарау, атып ҡарау; **пристреля́ть ружьё** мылтыҡты атып һынау

**ПРИСТРЕЛЯ́ТЬСЯ** *сов.* прицелды дөрөҫләү (билдәләү), (ҡоралды) сәпкә йүнәлтеү (тоҫҡау)

**ПРИСТРО́ИТЬ** *сов.* **1.** *что, к чему* (*дополнительно построить*) төкәү, төкәтеп һалыу (ҡороу); **пристро́ить к до́му се́ни** өйгә төкәтеп солан

эшләү **2.** *кого-что*; *разг.* (*поместить*) яйлап ҡуйыу, һалып (иплəп) ҡуйыу, урынлаштырыу; **пристро́ить чемода́н на по́лку** сумаҙанды кәштәгә ҡуйыу **3.** *кого-что*; *разг.* (*устроить куда-л.*) урынлаштырыу; **пристро́ить на рабо́ту** эшкә урынлаштырыу **4.** *кого-что* (*выстроить рядом*) рәткә (сафҡа) теҙеү, йәнәш теҙеү

**ПРИСТРО́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*расположиться*) урынлашыу, һыйыныу **2.** *к кому-чему* (*пристать*) ҡушылып китеү, эйәреү **3.** *разг.* (*устроиться*) (йәтеш урынға) урынлашыу; **пристро́иться в конто́ру** контораға урынлашыу **4.** (*примкнуть к строю*) бер сафҡа теҙелеү, йәнәш баҫыу

**ПРИСТРО́Й** *м см.* **пристро́йка** 2; **сде́лать к до́му пристро́й** йортҡа төкәтмә һалыу (төҙөү)

**ПРИСТРО́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **пристро́ить** — **пристра́ивать** 1; **2.** (*то, что пристроено*) төкәтмә; **ка́менная пристро́йка** таш төкәтмә

**ПРИСТРОЧИ́ТЬ** *сов. что* ҡайыу, тегеп сығыу, тегеп ҡуйыу (*машинала*); **пристрочи́ть воротни́к** яға ҡайыу

**ПРИСТРУ́НИВАТЬ** *несов. см.* **пристру́нить**

**ПРИСТРУ́НИТЬ** и **ПРИСТРУНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ныҡлап ҡулға алыу, тыйыу, тыйып ҡуйыу

**ПРИСТУ́КИВАТЬ** *несов. см.* **присту́кнуть**

**ПРИСТУ́КНУТЬ** *сов.* **1.** *что*, *чем* һуғып (тибеп) алыу, таҡылдатып (туҡылдатып) алыу; **присту́кнуть каблуко́м** үксә менән тибеп ҡуйыу **2.** *кого*; *прост.* (*убить*) үлтереү, үлтерә һуғыу

**ПРИ́СТУП** *м* **1.** *см.* **приступи́ть** — **приступа́ть** 1; **2.** (*момент обострения*) өйәнәк; **при́ступ головно́й бо́ли** баш өйәнәге; **проявле́ние при́ступа** өйәнәге ҡуҙғалыу **3.** *чего* (*внезапное, сильное проявление какого-л. душевного состояния*) бик ныҡ (ҡаты) -ған/-гән саҡ (хәл); **при́ступ отча́яния** бик ныҡ өмөтһеҙләнеккә бирелгән саҡ **4.** *воен.* (*атака*) һөжүм; **пойти́ на при́ступ** һөжүмгә барыу

**ПРИСТУПА́ТЬ** *несов. см.* **приступи́ть**

**ПРИСТУПА́ТЬСЯ** *несов. см.* **приступи́ться**

**ПРИСТУПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *к чему* башлау, керешеү, тотоноу; **приступи́ть к де́лу** эшкә тотоноу **2.** *к кому-чему*; *уст.* (*близко подойти*) яҡын барыу (килеү), яҡынлашыу; **приступи́ть к го́роду** ҡалаға яҡынлашыу **3.** *уст.* (*настойчиво обратиться*) бәйләнеү, ҡаҡшатыу, теңкәгә тейеү; **приступи́л ко мне с про́сьбой** һорауы менән ҡаҡшатты

**ПРИСТУПИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* яҡын килеү, яҡынлашыу, янына барыу, артынан йөрөү

**ПРИСТУ́ПОК** *м* и *разг.* **ПРИСТУ́ПКА** *ж* баҫҡыс, киртләс; **встать на присту́пок** баҫҡысҡа баҫыу

**ПРИСТЫДИ́ТЬ** *сов. кого-что* оялтыу, оятлы итеү, йөҙөн ҡыҙартыу

**ПРИСТЯ́ЖКА** *ж* **1.** (*род запряжки лошади*) мисәүләп егеү, мисәүләү; **запряга́ть в пристя́жку** мисәүләп (мисәүгә) егеү **2.** (*пристяжная лошадь*) мисәүҙәге ат, мисәү аты, мисәүле ат

**ПРИСТЯЖНО́Й,** -ая, -ое **1.** мисәүҙәге, мисәүләп егелгән; **пристяжна́я ло́шадь** мисәүҙәге ат **2.** *в знач. сущ.* **пристяжна́я** *ж* мисәү аты, мисәүле ат, мисәүҙәге ат

**ПРИСУДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* хөкөм сығарыу, хөкөм итеү, ҡарар сығарыу; **присуди́ть к штра́фу** штраф һалыу тураһында ҡарар сығарыу **2.** *что*, *кому* бирергә ҡарар сығарыу (итеү), биреү; **присуди́ть пе́рвую пре́мию** беренсе премия биреү

**ПРИСУЖДА́ТЬ** *несов. см.* **присуди́ть**

**ПРИСУЖДА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **присужда́ть**

**ПРИСУЖДЕ́НИЕ** *с см.* **присуди́ть** — **присужда́ть**; **присужде́ние учёной сте́пени** ғилми дәрәжә биреү

**ПРИСУ́ТСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое эш ...ы; **прису́тственный день** эш көнө ♦ **прису́тственное ме́сто** *уст.*: 1) дәүләт учреждениеһы; 2) шундай учреждение урынлашҡан бина

**ПРИСУ́ТСТВИЕ** *с* булыу (*кеше, әйбер һ.б. хаҡында*); **в моём прису́тствии** минең алда; **прису́тствие га́зов в воде́** газдарҙың һыуҙа булыуы ♦ **прису́тствие ду́ха** юғалып ҡалмау, ҡаушап төшмәү

**ПРИСУ́ТСТВОВАТЬ** *несов.* булыу, ҡатнашыу; **прису́тствовать на заседа́нии** ултырышта булыу

**ПРИСУ́ТСТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **прису́тствовать 2.** *в знач. сущ.* **прису́тствующие** *мн.* ҡатнашыусылар, булғандар

**ПРИСУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **присучи́ть**

**ПРИСУЧИ́ТЬ** *сов. что* ишеп (ҡатып) ялғау; **присучи́ть концы́ верёвок** бауҙарҙың остарын ишеп ялғау

**ПРИСУ́ЩИЙ,** -ая, -ее хас, хас булған; **с прису́щим ей ю́мором** уға хас булған шаянлыҡ менән

**ПРИСЧИТА́ТЬ** *сов. что* иҫәпкә ҡушып ҡуйыу, хисаплағанда (һанағанда) өҫтәү, өҫтәп иҫәпләү

**ПРИСЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **присчита́ть**

**ПРИСЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **присла́ть**

**ПРИСЫЛА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **присыла́ть**

**ПРИСЫ́ЛКА** *ж* **1.** *см.* **присла́ть** — **присыла́ть**; **присы́лка де́нег** аҡса ебәреү **2.** *разг.* ебәрелгән әйбер

**ПРИСЫ́ПАТЬ** *сов.* **1.** *что*, *чего* (*прибавить*) өҫтәп һалыу (һибеү), (бер аҙ) өҫтәү; **присы́пать крупы́** бер аҙ ярма өҫтәү **2.** *что*, *чем* (*слегка посыпать*) һибеү, һипкеләү; **присы́пать пу́дрой** пудра һибеү **3.** *что*, *чего* (*насыпать вплотную к чему-л.*) өйөү, һалыу; **присы́пать песо́к к забо́ру** ҡойма буйына ҡом өйөү

**ПРИСЫПА́ТЬ** *несов. см.* **присы́пать**

**ПРИСЫ́ПКА** *ж* **1.** *см.* **присы́пать** — **присыпа́ть** **2.** (*порошок*) онтаҡ дарыу

**ПРИСЫХА́ТЬ** *несов. см.* **присо́хнуть**

**ПРИСЯ́ГА** *ж* ант; **во́инская прися́га** хәрби ант; **дава́ть прися́гу** ант биреү; **быть ве́рным прися́ге** антты тотоу

**ПРИСЯГА́ТЬ** *несов. кому-чему* ант итеү (биреү)

**ПРИСЯГНУ́ТЬ** *сов. см.* **присяга́ть**

**ПРИСЯ́ДКА** *ж*; *разг.* сүгәләү (*бейеү хәрәкәте*)

**ПРИСЯ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* ант иткән, ант биргән (кеше); **прися́жный гуса́р** ант биргән гусар **2.** (*всегдашний*) ғәҙәттәге, даими, һәр ваҡыт (була торған); **прися́жный гармони́ст** һәр ваҡыт уйнай торған гармунсы **3.** *в знач. сущ.* **прися́жный** *м см.* **прися́жный заседа́тель** ♦ **прися́жный заседа́тель** присяжный, суд ултырышында ҡатнашыусы; **суд прися́жных** присяжныйҙар суды (*присяжныйҙар ҡатнашлығында үткәрелә торған суд*)

**ПРИТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **притаи́ть**

**ПРИТАИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* әйтмәү, йәшереп ҡалдырыу ♦ **притаи́ть дыха́ние** тын да сығармау (алмау)

**ПРИТАИ́ТЬСЯ** *сов.* йәшенеү, боҫоу, йәшенеп тороу; **притаи́ться за куста́ми** ҡыуаҡтар артына боҫоу

**ПРИТА́ПТЫВАТЬ** *несов. см.* **притопта́ть**

**ПРИТА́ПТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **притопта́ться** **2.** *страд. от* **прита́птывать**

**ПРИТА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **притащи́ть**

**ПРИТАЧА́ТЬ** *сов. что*; *спец.* ултыртыу, тегеп (һырып) ҡуйыу; **притача́ть рукава́** ең ултыртыу

**ПРИТА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **притача́ть**

**ПРИТАЩИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*приволочь*) һөйрәп килтереү, һөйрәп алып килеү **2.** *разг.* (*насильно привести*) көсләп килтереү

**ПРИТАЩИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*приплестись*) көс-хәл менән килеү, көскә-көскә (саҡ-саҡ) килеп етеү

**ПРИТВОРИ́ТЬ** *сов. что* еткермәй ябыу, ҡыҫып ҡуйыу; **притвори́ть дверь** ишекте ҡыҫып ҡуйыу

**ПРИТВОРИ́ТЬСЯ I** *сов.* ябыла төшөү, еткерә ябылмау, ҡыҫып ҡуйылыу

**ПРИТВОРИ́ТЬСЯ II** *сов.* һалышыу, булып ҡыланыу; **притвори́ться спя́щим** йоҡлағанға һалышыу; **притвори́ться больны́м** ауырыу булып ҡыланыу

**ПРИТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое рыя, рыялы, яһалма; **притво́рный смех** яһалма көлөү

**ПРИТВО́РСТВО** *с* яһалма ҡыланыш, яһалмалылыҡ, рыя

**ПРИТВО́РЩИК** *м* и **ПРИТВО́РЩИЦА** *ж* алдаҡсы, яһалма ҡылыҡлы, ҡылансыҡ

**ПРИТВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **притвори́ть**

**ПРИТВОРЯ́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **притвори́ться** I; **2.** *страд. от* **притворя́ть**

**ПРИТВОРЯ́ТЬСЯ II** *несов. см.* **притвори́ться** II

**ПРИТВОРЯ́ШКА** **1.** *м* и *ж*; *разг. см.* **притво́рщик** **2.** *мн.* **притворя́шки**; *зоол.* тишкес ҡуңыҙ

**ПРИТЕКА́ТЬ** *несов. см.* **прите́чь**

**ПРИТЕРЕ́ТЬ** *сов. что*; *тех.* ашлап (йәпләп, йәтешләп) ябыу, ҡырып (эшкәртеп) тура килтереү; **притере́ть про́бку к буты́лке** шешә тығынын йәтешләп ябыу

**ПРИТЕРПЕ́ТЬСЯ** *сов. к кому-чему* и *без доп.*; *разг.* сыҙап (түҙеп) өйрәнеү, күнегеп китеү; **притерпе́ться к бо́ли** ауыртыуға күнегеп китеү

**ПРИТЁРТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **притере́ть** **2.** *прил.* ҡырып ашланған, ныҡлап ябылған; **притёртая про́бка** ҡырып ашланған тығын

**ПРИТЕСНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **притесни́ть** — **притесня́ть** **2.** *обычно мн.* **притесне́ния** ҡыҫым, йәбер, золом, иҙеү; **страда́ть от притесне́ний** ҡыҫымдан интегеү

**ПРИТЕСНИ́ТЕЛЬ** *м* и **ПРИТЕСНИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* иҙеүсе, ҡыҫымсы, залим

**ПРИТЕСНИ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡағыу, йәберләү, ҡыҫыу

**ПРИТЕСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **притесни́ть**

**ПРИТЕСНЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **притесня́ть**

**ПРИТЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** (*о жидкости, воздухе*) ағыу, инеү, ағылыу, ағып килеү, ағып килеп етеү **2.** *перен.*, *уст.* (*явиться, прийти*) килеү, ағып тороу, ағылыу

**ПРИТИРА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **притира́ть** **2.** *уст.* (*вещество для втирания в кожу*) һөртөнөү нәмәләре, һөртөү (ыуыу) өсөн дарыу

**ПРИТИРА́ТЬ** *несов. см.* **притере́ть**

**ПРИТИ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **прити́снуть**

**ПРИТИ́СНУТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** *обычно чем* килтереп ҡыҫыу, ҡыҫтырыу; **прити́снуть к стене́** стенаға килтереп ҡыҫыу **2.** *перен.* ҡыҫыу, ҡыҫырыҡлау, ауыр хәлгә ҡуйыу

**ПРИТИХА́ТЬ** *несов. см.* **прити́хнуть**

**ПРИТИ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** (*умолкнуть, присмиреть*) тыныу, тынып ҡалыу, шымыу; **де́ти прити́хли** балалар тынып ҡалды **2.** (*стать тише, слабее*) баҫылыу, тыныу, тына төшөү, баҫыла (тыма) төшөү, әкренәйеү; **ве́тер прити́х** ел баҫыла төштө

**ПРИТКНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *разг.* (*приколоть*) ҡаҙау; **приткну́ть бро́шку** брошка ҡаҙау **2.** (*притулить, примостить*) ҡыҫтырыу, тығыу; **приткну́ть ве́щи** әйберҙе тығыу **3.** *кого*; *прост.* (*устроить куда придётся*) тығыу, ҡыҫылдырыу

**ПРИТКНУ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* һыйыныу, морон төртөү; **не́где приткну́ться** һыйыныр урын юҡ

**ПРИТО́К** *м* **1.** *см.* **прите́чь — притека́ть**; **прито́к во́здуха** һауаның ағылыуы (ағымы) **2.** *чего* (*подъём*) килеү, артыу, көсәйеү; **прито́к сил** көс артыу **3.** (*река*) ҡушылдыҡ, ҡояр йылға; **Сакма́ра — пра́вый прито́к Ура́ла** Һаҡмар — Уралдың уң ҡушылдығы

**ПРИ́ТОЛОКА** *ж* ишек башы, ишек ҡашағаһы

**ПРИТО́М** *союз* (*обычно в сочетании с союзами "и", "да", "а"*) өҫтәүенә, шуның өҫтөнә, шуның менән бергә; **она́ умна́, прито́м и добра́** ул аҡыллы, өҫтәүенә изгелекле лә

**ПРИТО́Н** *м* оя (*ниндәйҙер боҙоҡлоҡтар менән шөғөлләнеүсе төркөм йыйыла торған урын*); **воровско́й прито́н** ҡараҡтар ояһы

**ПРИТО́ПНУТЬ** *сов. чем* тып итеп баҫып ҡуйыу, аяҡ тибеү (*асыу менән*)

**ПРИТОПТА́ТЬ** *сов. что* тапау, өҫтөндә йөрөп иҙеү, тапап (иҙеп) бөтөрөү, тапап ташлау; **притопта́ть траву́** үләнде тапап бөтөрөү

**ПРИТОПТА́ТЬСЯ** *сов.* иҙелеү, тапалыу, тапалып (иҙелеп, тығыҙланып) бөтөү; **трава́ притопта́лась** үлән тапалып бөткән

**ПРИТО́ПЫВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **прито́пнуть** **2.** (*в такт чему-л.*) тыпылдатып тороу, тып-тып баҫыу

**ПРИТОРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **приторочи́ть**

**ПРИТОРМА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **притормози́ть**

**ПРИТОРМОЗИ́ТЬ** *что* и *без доп.* тормоз биреү (һалыу), тормозлау, туҡтата биреү, (хәрәкәтен) аҡрынайтыу, аҡрынайта төшөү; **притормози́ть маши́ну** машинаның хәрәкәтен аҡрынайтыу

**ПРИ́ТОРНОСТЬ** *ж* **1.** үтә татлылыҡ (сөсөлөк), күңел болғатҡыс булыу **2.** *перен.* (*слащавость*) сөсө теллелек, артыҡ сөсө ҡыланыш

**ПРИ́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үтә татлы ауырсы; (*о запахе*) күңел болғатҡыс; **при́торный за́пах** күңел болғатҡыс еҫ **2.** *перен.* (*слащавый*) сөсө, сөсөкәй, күңел болғатҡыс; **при́торный челове́к** сөсө телле кеше

**ПРИТОРОЧИ́ТЬ** *сов. что* ҡанъяғаға бәйләү, эйәр янына аҫыу; **приторочи́ть мешо́к к седлу́** тоҡто эйәр ҡанъяғаһына бәйләү

**ПРИТРА́ГИВАТЬСЯ** *несов. см.* **притро́нуться**

**ПРИТРО́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** *к кому-чему* (*прикоснуться*) тейеү, ҡул тейҙереү, ороноу, ҡағылыу, тейеп ҡарау, йоғондороу; **позво́лить притро́нуться** ҡул тейҙерергә рөхсәт итеү **2.** *к чему*; *разг.* (*обычно с отрицанием*) ауыҙ итеү, тәмләп (татып) ҡарау; **она́ не притро́нулась к за́втраку** ул иртәнге ашты ауыҙ итеп тә ҡараманы

**ПРИТУЖА́ЛЬНИК** *м*; *спец.* борғоса таяғы, тыйғыса (*балаҫ һуғыу эшендә*)

**ПРИТУЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* һыйыныу, һырығыу, ҡыҫылыу

**ПРИТУПИ́ТЬ** *сов. что* **1.** үтмәҫләү, үтмәҫләндереү, тупартыу; **притупи́ть бри́тву** бәкене үтмәҫләү **2.** *перен.* (*ослабить*) тупаҫландырыу, насарландырыу; **притупи́ть чу́вства** хистәрҙе тупаҫландырыу

**ПРИТУПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о ноже*) үтмәҫләнеү; (*об игле*) тупарыу; (*о косе*) йөҙө ҡайтыу; **ле́звие косы́ притупи́лось** салғының йөҙө ҡайтҡан **2.** *перен.* (*ослабеть*) тупаҫланыу, насарланыу, ҡарыуы (нуры, көсө) ҡайтыу; **па́мять притупи́лась** хәтер насарланды; **зре́ние притупи́лось** күҙҙең нуры ҡайтты

**ПРИТУПЛЕ́НИЕ** *с см.* **притупи́ть — притупля́ть**, **притупи́ться — притупля́ться**

**ПРИТУПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **притупи́ть**

**ПРИТУПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **притупи́ться** **2.** *страд. от* **притупля́ть**

**ПРИТУШИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (*потушить*) яныуҙан туҡтатыу, һүндереү; **притуши́ть папиро́су** папиросты һүндереү **2.** (*огонь, свет*) кәметеү, ҡыҫыу, һүндерә (кәметә, ҡыҫа) төшөү; (*самовар*) баҫыу, баҫа биреү

**ПРИ́ТЧА** *ж* **1.** *книжн.* кинәйәле һәм ғибрәтле хикәйә, мәҫәл **2.** *уст.*, *разг.* (*о непонятном явлении*) хикмәт, әкәмәт, ғәжәп; **что за при́тча!** ни ғәжәп!, был ни хикмәт! ♦ **при́тча во язы́цех** һәр кемдең телендәге нәмә

**ПРИТЯГА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* һөймәлек, тартып тороусанлыҡ

**ПРИТЯГА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күңелгә ятышлыҡ, һөйҙөргөс, һөйкөмлө, һөймәлекле, үҙенә тартып торған, күңел биләгес (әүрәткес), ҡыҙыҡлы, ҡыҙыҡтырғыс; **притяга́тельный челове́к** һөймәлекле кеше

**ПРИТЯ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **притяну́ть**

**ПРИТЯЖА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* эйәлек; **притяжа́тельное местоиме́ние** эйәлек алмашы

**ПРИТЯЖЕ́НИЕ** *с*; *физ.* тартылыш, тартылыу, тартым; **зако́н земно́го притяже́ния** ерҙең тартым законы

**ПРИТЯЗА́НИЕ** *с* **1.** (*предъявление прав на что-л.*) дәғүә (итеү), ныҡышыу; **притяза́ние на насле́дство** вариҫлыҡҡа дәғүә итеү **2.** (*претензия*) булырға (булып күренергә) тырышыу (ынтылыу), ынтылыу; **притяза́ние на учёность** ғилемле булып күренергә тырышыу; **притяза́ние на пе́рвенство** беренселеккә ынтылыу

**ПРИТЯЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое талап итеүсән, дәғүә итеү ...ы, дәғүәсел; **притяза́тельный тон** дәғүәсел тон

**ПРИТЯЗА́ТЬ** *несов. на что*; *книжн.* **1.** дәғүә итеү, дәғүәләү **2.** (*стремиться к признанию*) булып ҡыланыу, булып күренергә тырышыу; **притяза́ть на остроу́мие** тапҡыр һүҙле булып күренергә тырышыу

**ПРИТЯНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** тартыу, тартып килтереү, яҡын тартыу; **притяну́ть к бе́регу** ярға яҡын килтереү **2.** *перен.* (*вызвать интерес*) тартыу, йәлеп итеү **3.** *к чему*; *перен.*, *разг.* (*призвать*) тартыу, тарттырыу; **притяну́ть к от-**

**ве́ту** яуапҡа тартыу ♦ **притяну́ть за́ волосы (за́ уши)** сәсенән (ҡолағынан) тартып килтереү (*нигеҙһеҙ дәлилдәрҙе*)

**ПРИУКРА́СИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** бер аҙ (аҙыраҡ) матурлау, матурлай төшөү (биреү), биҙәштереү; **приукра́сить ко́мнату** бүлмәне биҙәштереү **2.** үтә матурлау, арттырыу, үтә матурлап (арттырып) күрһәтеү; **расска́зывать приукра́шивая** арттырып һөйләү; **приукра́сить досто́инства** *чьи-л. кемдеңдер* дәрәжәһен үтә арттырып күрһәтеү

**ПРИУКРА́СИТЬСЯ** *сов.* матурланыу, биҙәнеү

**ПРИУКРАША́ТЬ** *несов. см.* **приукра́сить**

**ПРИУКРАША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приукра́ситься 2.** *страд. от* **приукраша́ть**

**ПРИУМЕНЬША́ТЬ** *несов. см.* **приуме́ньшить**

**ПРИУМЕ́НЬШИТЬ** и *уст.* **ПРИУМЕНЬШИ́ТЬ** *сов. что* кәметә (аҙайта, кесерәйтә) төшөү, кесерәйтеңкерәү, кәметеңкерәү, кәметеп күрһәтеү, кәметә (аҙайта, кесерәйтә) биреү; **приуме́ньшить расхо́ды** сығымдарҙы кәметә төшөү; **приуме́ньшить опа́сность** ҡурҡынысты кәметеп күрһәтеү

**ПРИУМНОЖА́ТЬ** *несов. см.* **приумно́жить**

**ПРИУМНОЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приумно́житься 2.** *страд. от* **приумножа́ть**

**ПРИУМНОЖЕ́НИЕ** *с см.* **приумно́жить** — **приумножа́ть**, **приумно́житься** — **приумножа́ться**

**ПРИУМНО́ЖИТЬ** *сов. что* арттырыу, арттыра төшөү (биреү), өҫтәү, ишәйтеү; **приумно́жить дохо́ды** килемдәрҙе арттыра төшөү

**ПРИУМНО́ЖИТЬСЯ** *сов.* тағы ла артыу, өҫтәлеү, арта биреү (төшөү), ишәйеү; **си́лы приумно́жились** көстәр арта төштө

**ПРИУМОЛКА́ТЬ** *несов. см.* **приумо́лкнуть**

**ПРИУМО́ЛКНУТЬ** *сов.*; *разг.* шымып (тымып, тынып) ҡалыу (тороу); **солове́й приумо́лк** һандуғас тынып ҡалды

**ПРИУНЫ́ТЬ** *сов.*; *разг.* бойоғоп китеү, күңелһеҙләнә төшөү, ҡайғыға төшөү, төшөнкө (күңелһеҙ) уйға бирелеү

**ПРИУРО́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **приуро́чить**

**ПРИУРО́ЧИТЬ** *сов. что, к чему* тура (тап) килтереү, (ваҡытына) тура (тап) килтереү, ярашлы итеү; **приуро́чить отъе́зд к весне́** китеүҙе яҙға тура килтереү

**ПРИУСА́ДЕБНЫЙ,** -ая, -ое өй янындағы, йорт кәртәһе эсендәге, йорт эргәһендәге; **приуса́дебный уча́сток** өй янындағы участка (ер)

**ПРИУТИ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** (*стать тише*) бер аҙ тыныу (шымыу, тымыу), тынып (шымып) тороу; **ве́тер приути́х** ел бер аҙ тынды **2.** (*стать молчаливым*) тынып ҡалыу, тымыу, шымтайыу, шымып тороу; **де́ти приути́хли** балалар тынып ҡалды

**ПРИУЧА́ТЬ** *несов. см.* **приучи́ть**

**ПРИУЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **приучи́ться 2.** *страд. от* **приуча́ть**

**ПРИУЧИ́ТЬ** *сов. кого-что, к чему* и *с неопр.* өйрәтеү, күнектереү, ғәҙәтенә индереү, ғәҙәтләндереү; эйәләштереү; **приучи́ть к поря́дку** тәртипкә өйрәтеү; **приучи́ть скоти́ну к до́му** малды өйгә эйәләштереү

**ПРИУЧИ́ТЬСЯ** *сов. к чему* өйрәнеү, ғәҙәтләнеү, күнегеү; **приучи́ться к поря́дку** тәртипкә өйрәнеү

**ПРИФРАНТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡупшыланыу, ҡупшы кейенеү, яһаныу

**ПРИФРОНТОВО́Й,** -ая, -ое фронт янындағы (тирәһендәге, буйындағы), фронт алды; **прифронтова́я полоса́** фронт алды һыҙығы

**ПРИХВА́РЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* ауырыҡһыныу, ауырып тороу, сирләштереү

**ПРИХВАСТНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* маҡтанып алыу (ҡуйыу), бер аҙ маҡтаныу

**ПРИХВА́СТЫВАТЬ** *несов. см.* **прихвастну́ть**

**ПРИХВАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*захватить, удерживая*) эләктереү, ҡыҫып тотоп алыу **2.** *что* (*закрепить*) эләктереп бәйләп ҡуйыу; **прихвати́ть ве́щи на возу́ верёвкой** йөктәге әйберҙәрҙе бау менән эләктереп бәйләп ҡуйыу **3.** *кого-что, чего* (*взять с собой*) алып китеү, янға алыу, (үҙе менән) алыу; **прихвати́ть кни́гу с собо́й** китапты үҙең менән алыу **4.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*слегка заморозить*) саҡ ҡына туңдырыу; (*заморозив, повредить*) ҡырау тейеү (һуғыу, алыу); **цветы́ прихвати́ло моро́зом** *безл.* сәскәләрҙе ҡырау алған **5.** *прост.* (*о болезни*) башланыу, башланып китеү, йоғоу; (*о параличе*) һуғыу

**ПРИХВА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **прихвати́ть**

**ПРИХВОРНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ауырыҡһынып тороу, сирләштереү

**ПРИ́ХВОСТЕНЬ** *м*; *разг.*, *презр.* ялағай, ҡойроҡ болғаусы, ярамһаҡ, ҡуштан

**ПРИХЛЕБА́ТЕЛЬ** *м*; *разг.*, *презр.* әрәмтамаҡ, тәрилкә ялаусы

**ПРИХЛЕБНУ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *разг.* эсеп ҡуйыу, һемереү

**ПРИХЛЁБЫВАТЬ** *несов. что*; *разг.* **1.** *см.* **прихлебну́ть 2.** эсеп-эсеп ҡуйыу, әҙләп-әҙләп эсеү; **прихлёбывать чай** сәйҙе әҙләп-әҙләп эсеү

**ПРИХЛО́ПНУТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, по чему* (*хлопнуть, ударить ладонью сверху*) шап иттереп һуғыу; **прихло́пнуть ладо́нью по́ столу** ус менән өҫтәлгә шап иттереп һуғыу **2.** *кого-что*; *прост.* (*убить*) һуғып үлтереү **3.** *что* (*закрыть, хлопнув*) шапылдатып ябыу, ҡаты ябыу, шартлатып бикләп ҡуйыу; **прихло́пнуть дверь** ишекте шапылдатып ябыу **4.** *кого-что*; *разг.* (*прищемить*) ҡыҫыу, ҡыҫтырып ябыу, ҡыҫтырыу; **прихло́пнуть ру́ку** ҡулды ҡыҫтырыу

**ПРИХЛО́ПЫВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **прихло́пнуть 2.** (*хлопать в такт*) һуҡҡылау, сапҡылау; **прихло́пывать в ладо́ши** ҡул сабып тороу

**ПРИХЛЫ́НУТЬ** *сов.* **1.** (*стремительно притечь*) шаулап (урғылып) ағып килеү, ағылыу, баҫып алыу; (*о крови*) сөбөрләп ағып китеү **2.** (*о людях*) ағылыу, күмәкләшеп (өйкөлөшөп) ташланыу, ябырылыу, ябырылып килеү; **наро́д прихлы́нул на пло́щадь** халыҡ майҙанға ағылып килде **3.** *перен.* (*о чувствах, мыслях и т.п.*) ҡапыл килеп баҫыу, тоҡаныу, уяныу; **прихлы́нули мы́сли** ҡапыл фекер уянды

**ПРИХО́Д** *м* **1.** *см.* **приходи́ть** 1, 2; **2.** *бухг.* килем, керем; **записа́ть в прихо́д** керемгә яҙып ҡуйыу; **прихо́д и расхо́д** керем һәм сығым **3.** *церк.* приход, мәхәллә

**ПРИХОДИ́ТЬ** *несов. см.* **прийти́**

**ПРИХОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прийти́сь 2.** *кому* (*являться, доводиться родственником*) булыу; **она́ прихо́дится мне тёткой** ул миңә апай була

**ПРИХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *бухг.* керем(дәр) ...ы; **прихо́дный о́рдер** керемдәр ордеры

**ПРИХО́ДОВАТЬ** *несов. что*; *бухг.* килемгә индереү, керемгә яҙыу

**ПРИХО́ДО-РАСХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *бухг.* керем-сығым(дар) ...ы, керем-сығымдар яҙыла торған; **прихо́до-расхо́дная кни́га** керем-сығымдар кенәгәһе

**ПРИХО́ДСКИЙ,** -ая, -ое *церк.* приход ...ы, мәхәллә ...ы; **прихо́дская це́рковь** приход сиркәүе; **прихо́дская шко́ла** приход (мәхәллә) мәктәбе

**ПРИХОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **приходи́ть 2.** *прил.* килгән, килә (килеп йөрөй) торған; **приходя́щая ня́ня** килеп йөрөй торған бала ҡараусы

**ПРИХОЖА́НИН** *м* и **ПРИХОЖА́НКА** *ж*; *церк.* мәхәллә кешеһе

**ПРИХО́ЖАЯ** *ж* үткелек, алғы бүлмә, ал яҡ; **раздева́ться в прихо́жей** үткелектә сисенеү

**ПРИХОРА́ШИВАТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* матурлау, ыҫпайлау, биҙәү, ҡупшылау; **прихора́шивать кварти́ру** фатирҙы биҙәү

**ПРИХОРА́ШИВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* ыҫпайланыу, биҙәнеү, матурланыу; **прихора́шиваться пе́ред зе́ркалом** көҙгө алдында ыҫпайланыу

**ПРИХОТЛИ́ВОСТЬ** *ж* **1.** (*требовательность*) талымлылыҡ, талапсанлыҡ, һайланыусанлыҡ; **прихотли́вость хара́ктера** холоҡтоң талапсанлығы **2.** (*затейливость*) хикмәтлелек; **прихотли́вость орна́мента** биҙәктең хикмәтлелеге

**ПРИХОТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*капризный, требовательный*) талымлы, наҙлы, төрләнсек, көйһөҙ; (*в еде*) көҫәүсел; **прихотли́вый челове́к** талымлы кеше **2.** (*затейливый*) хикмәтле, әкәмәт; **прихотли́вый узо́р** хикмәтле биҙәк

**ПРИ́ХОТЬ** *ж* күңел көҫәгән (урынһыҙ, нигеҙһеҙ) теләк, талым, көҫәү, ҡылыҡтағы (холоҡтағы) кирелек, көйһөҙләк; **не замеча́ть при́хоти** көйһөҙлөгөн күрмәү

**ПРИХРА́МЫВАТЬ** *несов.* аҡһаҡлау, аҡһаңҡырау, аҡһабыраҡ (сатанлап) йөрөү; **шага́ть прихра́мывая** аҡһаҡлап атлау

**ПРИЦВЕ́ТНИК** *м*; *бот.* сәскә ҡолаҡсыны, сәскә яны япрағы

**ПРИЦЕ́Л** *м* **1.** *см.* **прице́литься** — **прице́ливаться 2.** (*приспособление*) мәрәйлек, сәплек; **ружьё с прице́лом** сәпле мылтыҡ ♦ **брать (взять) на прице́л** иғтибарҙы йүнәлтеү; **да́льний (далёкий) прице́л** алыҫҡа ҡарау, алдағы маҡсат

**ПРИЦЕ́ЛИВАТЬСЯ** *несов. см.* **прице́литься**

**ПРИЦЕ́ЛИТЬСЯ** *сов. в кого-что* тоҫҡау, күҙәү, төҙәү

**ПРИЦЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сәплек ...ы, мәрәйлек ...ы, тоҫҡау ...ы; **прице́льная ра́ма** мәрәйлек ҡыҫаны **2.** төҙәлгән, тоҫҡалған; **прице́льный ого́нь** тоҫҡап атыу

**ПРИЦЕ́НИВАТЬСЯ** *несов. см.* **прицени́ться**

**ПРИЦЕНИ́ТЬСЯ** *сов. к чему* хаҡын һорау (һорашыу), хаҡын белешеү; **прицени́ться к това́ру** тауарҙың хаҡын белешеү

**ПРИЦЕ́П** *м* тағылма, арба, таҡма (машина), һөйрәтке; **тра́кторный прице́п** трактор арбаһы

**ПРИЦЕПИ́ТЬ** *сов. что* **1.** тағыу, эләктереү, һаҡтырыу (ҡыуғында); **прицепи́ть ваго́н** вагон тағыу; **прицепи́ть бревно́ к ло́дке** кәмәгә бүрәнә һаҡтырыу **2.** *разг.* ҡаҙап (сәнсеп, тағып, эләктереп) ҡуйыу; **прицепи́ть бант** бант ҡаҙап ҡуйыу

**ПРИЦЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*присоединиться к чему-л. движущемуся*) тағылыу, һағыу, йәбешеү; **де́рево прицепи́лось** ағас һаҡҡан (*урман ҡырҡҡанда*) **2.** (*пристать*) йәбешеү, һырыу; **репе́йник прицепи́лся** дегәнәк йәбешкән **3.** *перен., разг.* (*о болезни*) эләгеү, йоғоу **4.** *перен., разг.* (*примкнуть*) тағылыу, эйәреү **5.** *перен., разг.* (*придраться*) бәйләнеү; **прицепи́ться к ребёнку** балаға бәйләнеү

**ПРИЦЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **прицепи́ть**

**ПРИЦЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прицепи́ться 2.** *страд. от* **прицепля́ть**

**ПРИЦЕ́ПЩИК** *м* тағылма машинала эшләүсе

**ПРИЧА́Л** *м* **1.** *см.* **прича́лить** — **прича́ливать 2.** (*место*) причал, туҡтау урыны **3.** (*канат*) арҡан, ҡанат

**ПРИЧА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **прича́лить**

**ПРИЧА́ЛИТЬ** *сов.* **1.** (*пристать — о судне и т.п.*) килеп туҡтау **2.** *что* (*привязать судно*) (тарттырып) бәйләп ҡуйыу

**ПРИЧА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бәйләй торған; **прича́льный кана́т** бәйләй торған арҡан

**ПРИЧА́СТИЕ** *с*; *грам.* сифат ҡылым; **действи́тельное прича́стие** хәҙерге заман сифат ҡылым

**ПРИЧА́СТНОСТЬ** *ж* ҡағылыш, ҡатнашлығы (ҡатнашы) булыу, мөнәсәбәте булыу

**ПРИЧА́СТНЫЙ I,** -ая, -ое ҡатнашы бар (булған); **быть прича́стным** *к чему-л.* *нимәгәлер* ҡатнашы булыу

**ПРИЧА́СТНЫЙ II,** -ая, -ое *грам.* сифат ҡылым ...ы; **прича́стный оборо́т** сифат ҡылым әйтеме

**ПРИЧЁМ** *союз* и *нареч.* **1.** *союз* (*к тому же, при этом*) өҫтәүенә, шуның менән бергә, тағы **2.** *нареч.* (*зачем, с какой стати*) ниңә, ниңә кәрәк, ни ҡатнашы бар; **причём тут я?** быға минең ни ҡатнашым бар?

**ПРИЧЁСАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **причеса́ть 2.** *прил.* тараулы; **аккура́тно причёсанный** ыҫпай тараулы

**ПРИЧЕСА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** тарау (сәс); **причёсывать во́лосы** сәс тарау **2.** (*сделать причёску*) причёска яһау

**ПРИЧЕСА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*причесать себя*) сәс тарау, тарап ҡуйыу, тараныу; **причеса́ться пе́ред зе́ркалом** көҙгө алдында сәс тарау **2.** *см.* **причеса́ть** 2

**ПРИЧЁСКА** *ж* **1.** *см.* **причеса́ть — причёсывать, причеса́ться — причёсываться**; **причёска воло́с** сәс тарау **2.** сәстараш, сәс, сәс үреме, причёска; **краси́вая причёска** матур итеп сәс үреү; **пы́шная причёска** ҡабарып торған (ҡабартып ҡуйылған) сәс

**ПРИЧЁСЫВАНИЕ** *с см.* **причёсывать, причёсываться**

**ПРИЧЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **причеса́ть**

**ПРИЧЁСЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **причеса́ться 2.** *страд. от* **причёсывать**

**ПРИЧИ́НА** *ж*; *разн. знач.* сәбәп, һылтау; **без причи́ны** сәбәпһеҙгә; **гла́вная причи́на** төп сәбәп; **найти́ причи́ну** һылтау табыу; **уважи́тельная причи́на** кисерерлек сәбәп ♦ **по причи́не** *чего* айҡанлы

**ПРИЧИНИ́ТЬ** *сов. что* килтереү, сәбәпсе булыу, яһау; **причини́ть вред** зыян килтереү; **причини́ть мно́го страда́ний** күп ғазап килтереү; **причини́ть беспоко́йство** мәшәкәт яһау

**ПРИЧИ́ННОСТЬ** *ж*; *филос.* сәбәплелек; **катего́рия причи́нности** сәбәплелек категорияһы

**ПРИЧИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *филос.* сәбәплелек ...ы, сәбәп ...ы; **причи́нная связь** сәбәп бәйләнеше **2.** *грам.* сәбәп; **причи́нные прида́точные предложе́ния** сәбәп эйәрсән һөйләмдәр

**ПРИЧИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **причини́ть**

**ПРИЧИ́СЛИТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*прибавить при подсчёте*) ҡушып (өҫтәп) иҫәпләү; **причи́слить су́мму к расхо́дам** сумманы сығымдарға ҡушып иҫәпләү **2.** (*назначить*) билдәләү, беркетеү; **причи́слить к полку́** полкка билдәләү; **причи́слить к гла́вному управле́нию** баш идаралыҡҡа беркетеү **3.** *кого-что* (*отнести к числу кого-чего-л.*) рәтенә индереү, һанау, иҫәпләү; **причи́слить к выдаю́щимся учёным** күренекле ғалимдар рәтенә индереү

**ПРИЧИСЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **причи́слить**

**ПРИЧИТА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **причита́ть 2.** (*обрядовая песня*) сеңләү, һыҡтау (*үлгән кешене күмергә барғанда, ҡыҙ биргәндә, һалдатҡа оҙатҡанда көйләп әйтелгән шиғри һүҙ*)

**ПРИЧИТА́ТЬ** *несов.* (ҡайғынан, хәсрәттән) ҡысҡырып (һамаҡлап) илау, сеңләү

**ПРИЧИТА́ТЬСЯ** *несов. кому, что* иҫәпләнеү, тейеш булыу, бирелергә тейешле булыу; **ско́лько с меня́ причита́ется?** минән күпме тейеш? ♦ **причита́ется** *с кого*; *разг.* бурыслы булыу, бирәсәге булыу, бирергә тейеш булыу

**ПРИЧМО́КИВАТЬ** *несов.* (ауыҙҙы) сапылдатыу (супылдатып тороу), тамшаныу

**ПРИЧУ́ДА** *ж* **1.** (*чудачество, прихоть*) сәйер ҡылыҡ, холоҡһоҙлоҡ **2.** (*нечто необычное*) хикмәт, әкәмәт; **причу́ды приро́ды** тәбиғәттең хикмәттәре

**ПРИЧУ́ДИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күҙгә күренеү, тойолоу

**ПРИЧУ́ДЛИВОСТЬ** *ж* әкәмәтлелек, хикмәтлелек, холоҡһоҙлоҡ

**ПРИЧУ́ДЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*замысловатый*) ғәжәп, хикмәтле, әкәмәт(ле); **причу́дливые узо́ры** хикмәтле биҙәктәр **2.** *разг.* (*капризный*) холоҡһоҙ, көйһөҙ

**ПРИШВАРТОВА́ТЬ** *сов. что*; *мор.* килтереп туҡтатыу, килтереп бәйләп ҡуйыу; **пришвартова́ть парохо́д** пароходты килтереп туҡтатыу

**ПРИШВАРТОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *мор.* килеп туҡтау; **ка́тер пришвартова́лся** катер килеп туҡтаны

**ПРИШВАРТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **пришвартова́ть**

**ПРИШВАРТО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пришвартова́ться 2.** *страд.* к **пришварто́вывать**

**ПРИШЕ́ЛЕЦ** *м* килмешәк (*ситтән килгән кеше*)

**ПРИШЕПЁТЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* аҙыраҡ ышылдап (ыҫылдап) һөйләшеү (*"с", "ҙ" өндәрен "ш", "ж" өндәренә оҡшатып әйтеү*)

**ПРИШЁПТЫВАТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *разг.* бышылдап әйтеү (һөйләшеү)

**ПРИШЕ́СТВИЕ** *с*; *книжн.* килеү, килеп сығыу, пәйҙә булыу

**ПРИШИБА́ТЬ** *несов. см.* **пришиби́ть**

**ПРИШИБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *прост.* (*убить*) һуғып (баҫып) үлтереү, һуғып имгәтеү **2.** *кого*; *перен.*, *разг.* (*привести в угнетённое состояние*) баҫыу, иҙеү, рухын төшөрөү

**ПРИШИ́БЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **пришиби́ть 2.** *прил.*, *разг.* (*подавленный*) иҙелгән, кәмһетелгән, рухы төшөрөлгән

**ПРИШИВА́ТЬ** *несов. см.* **приши́ть**

**ПРИШИВНО́Й,** -ая, -ое тегеп ҡуйылмалы, (ҡуша) тегеп ҡуйылған; **пришивно́й воротни́к** тегеп ҡуйылмалы яға

**ПРИШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*присоединить шитьём*) тегеп ҡуйыу, тегеү; (*рукав, воротник*) тегеп ҡуйыу, ултыртыу; (*пуговицу, петлю и т.п.*) тағыу, ҡаҙау, (*заплату*) ямау; **приши́ть воротни́к** яға тегеп ҡуйыу; **приши́ть пу́говицу**

күлдәккә төймә тағыу **2.** *кому-чему*; *перен.*, *прост.* (*ложно обвинить в чём-л.*) ғәйеп тағыу, юкка ғәйепләү

**ПРИШКО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мәктәп яны (янындағы); **пришко́льный уча́сток** мәктәп янындағы участка (ер)

**ПРИШЛЁПНУТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** (*шлёпнув, придавить*) һытыу, баҫып һытыу **2.** *разг.* (*слегка ударить*) һуғып алыу, шап итеп һуғыу

**ПРИШЛЁПЫВАТЬ** *несов. см.* **пришлёпнуть**

**ПРИ́ШЛЫЙ,** -ая, -ое ситтән килгән, килмешәк; **при́шлый челове́к** ситтән килгән кеше

**ПРИШПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **пришпи́лить**

**ПРИШПИ́ЛИТЬ** *сов. что* ҡаҙап (сәнсеп) ҡуйыу; **пришпи́лить бант** бант ҡаҙап ҡуйыу

**ПРИШПО́РИВАТЬ** *несов. см.* **пришпо́рить**

**ПРИШПО́РИТЬ** *сов. кого* **1.** (*коня*) шпорлау, тибенгеләү **2.** *перен.*, *разг.* (*возбудить, побудить к действию*) ҡуҙғытыу, төрткөләп тороу, ҡыуыу

**ПРИЩЁЛКИВАНИЕ** *с см.* **прищёлкивать**

**ПРИЩЁЛКИВАТЬ** *несов. см.* **прищёлкнуть**

**ПРИЩЁЛКНУТЬ** *сов. чем* шартлатыу, шартылдатыу, сартылдатыу; **прищёлкнуть языко́м** тел шартлатыу; **прищёлкнуть па́льцами** бармаҡ шартлатыу

**ПРИЩЕМИ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡыҫыу, ҡыҫтырыу, ҡыҫтырып имгәтеү; **прищеми́ть котёнку ла́пу** бесәй балаһының аяғын ҡыҫтырыу

**ПРИЩЕМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **прищеми́ть**

**ПРИЩЕ́П** *м*; *сад.* **1.** *см.* **прищепи́ть** — **прищепля́ть 2.** (*место, куда вставляется черенок*) ботаҡ ашлау урыны **3.** (*привитое растение*) ялғанған ағас (ботаҡ)

**ПРИЩЕПИ́ТЬ** *сов. что*; *сад.* бөрө ялғау, ботаҡ ялғау (ашлау)

**ПРИЩЕ́ПКА** *ж* кер ҡыҫтырғыс (эләктергес)

**ПРИЩЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **прищепи́ть**

**ПРИЩЕ́ПОК** *м*; *сад.* (*черенок*) ялғанма, ялғам (*бөрө йәки ботаҡ*)

**ПРИЩУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **прищу́рить**

**ПРИЩУ́РИВАТЬСЯ** *несов. см.* **прищу́риться**

**ПРИЩУ́РИТЬ** *сов. что* күҙҙе ҡыҫыу, (күҙҙе) ҡыҫып ҡарау

**ПРИЩУ́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*прищурить глаза*) күҙҙе ҡыҫып ҡарау **2.** (*стать прищуренным — о глазах*) ҡыҫылыу

**ПРИЮ́Т** *м* **1.** (*пристанище*) ҡыуыш, оя, төйәк; **без приюта** төйәкһеҙ; **ме́сто для прию́та** төйәк урыны **2.** *уст.* (*учреждение*) етемдәр йорто, приют; **де́тский прию́т** балалар приюты

**ПРИЮТИ́ТЬ** *сов. кого-что* һыйындырыу, (һыйыныр) урын биреү

**ПРИЮТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һыйыныу, һыйынып тороу; **приюти́ться у друзе́й** дуҫтарға һыйыныу **2.** *перен.* һыйыныу, ышыҡланыу; **до́мик приюти́лся в тени́ са́да** өй баҡса күләгәһенә ышыҡланып тора

**ПРИЯ́ЗНЬ** *ж* (*доброе чувство к кому-л.*) яҡшы тойғо, һәйбәт мөнәсәбәт

**ПРИЯ́ТЕЛЬ** *м* и **ПРИЯ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* дуҫ, әшнә, яҡын кеше; **быть прия́телем** дуҫ булыу

**ПРИЯ́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое дуҫтарса, әшнәләрсә; **прия́тельские отноше́ния** дуҫтарса мөнәсәбәттәр

**ПРИЯ́ТНО 1.** *нареч.* рәхәт, һәйбәт, яҡшы, күңелле; **прия́тно провести́ вре́мя** ваҡытты күңелле үткәреү; **прия́тно слы́шать** ишетеүе күңелле **2.** *кому в знач. сказ.*, *безл.* һәйбәт, күңелле; **мне э́то о́чень прия́тно** был минең өсөн бик һәйбәт

**ПРИЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яҡшы, күңелле, хуш, (күңелгә) ятышлы; **прия́тный за́пах** хуш еҫ; **прия́тное на слух и́мя** ҡолаҡҡа ятышлы исем; **прия́тная но́вость** яҡшы хәбәр; **прия́тная встре́ча** күңелле осрашыу **2.** (*привлекательный*) яғымлы, мөләйем; **прия́тный челове́к** яғымлы кеше ♦ **прия́тного аппети́та** аш тәмле булһын

**ПРО** *предлог с вин. п.*; *разг.* (*соответствует по значению предлогу "о"*) хаҡында, тураһында, турала; **ска́зка про во́лка** бүре хаҡында әкиәт; **рассказа́ть про знако́мых** дуҫтар тураһында һөйләү; **про меня́** минең турала ♦ **про запа́с** *см.* **запа́с**; **про себя́** *см.* **себя́**

**ПРО... I** *приставка* **1.** *ҡылым яһағанда ҡулланылып, түбәндәгеләрҙе аңлата*: 1) *өҙөп, ярып, тишеп сығыуҙы, мәҫ.*, **проткну́ть** үтә сәнсеү; **проби́ть** бәреп тишеү, үтә сығыу; 2) *берәй нәмә аша үтеүҙе, үткәреүҙе, тишеп сығыуҙы, мәҫ.*, **проте́чь** ағып сығыу, һарҡыу; **протолкну́ть** төртөп индереү; 3) *эргәнән, яндан үтеп киткәндә, мәҫ.*, **пробежа́ть** йүгереп уҙып китеү; 4) *ниндәйҙер арауыҡты* (*араны*) *үтеүҙе белдерә, мәҫ.*, **пройти́ пять киломе́тров** биш километр араны атлап үтеү; **проползти́ немно́го** бер аҙ шыуышып барыу; 5) *эштең ниндәҙер ваҡыт эсендә башҡарылыуын белдерә, мәҫ.*, **прорабо́тать семь часо́в** ете сәғәт буйы эшләү; **проспо́рить весь ве́чер** кис буйы бәхәсләшеү; 6) *эштең бөткәнлеген, аҙағына етеүен, мәҫ.*, **провари́ть** бешереп сығарыу; 7) *эштең эшләнмәй ҡалыуын күрһәтә, мәҫ.*, **прогляде́ть** күрмәй ҡалыу; 8) *зыян, ҡайғы һ.б. килтергән эште, мәҫ.*, **просчита́ться** отолоу, яңылышыу; 9) *бөтөрөү, тотоноп бөтөрөү, сарыф итеп бөтөрөүҙе белдерә, мәҫ.*, **прожи́ть (де́ньги)** (аҡсаны) тотоноп бөтөү; **пропе́ть (го́лос)** (тауышты) йырлап бөтөрөү; 10) *ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә башҡарылған эш-хәрәкәтте белдерә, мәҫ.*, **простона́ть** ыңғырашып ҡуйыу; **прогреме́ть** яңғырап китеү, күкрәп ҡуйыу; 11) *билдәле бер һөҙөмтә менән сикләнгән эш-хәрәкәтте белдерә, мәҫ.*, **проговори́ть** әйтеп ҡуйыу; **промя́млить** мыңғырлап ҡуйыу; 12) (*"-ся" кисәксәһе менән килгәндә*)



7 зак. 2.0007.06

*эш-хәрәкәттең ҡыҫҡалығын, сикләнгәнлеген белдерә, мәҫ.*, **пробежа́ться** йүгереп килеү; **прогуля́ться** атлап йөрөп килеү **2.** *исемдәргә ялғанғанда түбәндәге саралар ярҙамында тәржемә ителә*: *“аҙ ғына”*, *“бер аҙ” кеҫек рәүештәр менән, мәҫ.*, **про́зелень** аҙ ғына йәшкелт төҫ

**ПРО... II** *приставка*; *“яҡлы” тигән һүҙ менән исемдәр һәм сифаттар барлыҡҡа килтерә, мәҫ.*, **профаши́стский** фашистар яҡлы

**ПРОАНАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **анализи́ровать**

**ПРО́БА** *ж* **1.** *см.* **про́бовать** 1; **взять для про́бы** һынауға алыу; **про́ба голосо́в** тауышты һынап ҡарау **2.** (*образец, взятый для анализа*) проба, өлгө, үрнәк (*материалдың анализға алынған өлөшө*) **3.** (*количество драгоценного металла в сплаве*; *клеймо, обозначающее это количество, на ювелирных изделиях*) проба, тамға, келәймә; **зо́лото высо́кой про́бы** юғары келәймәле алтын **4.** *мед.* проба, һынау, тикшереү; **ко́жная про́ба** тире аша һынау ♦ **про́ба пера́** ҡәләм һынап ҡарау (*тәүге әҙәби әҫәр тураһында*)

**ПРОБАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** (*довольствоваться, ограничиваться чем-л.*) ҡәнәғәтләнеү, ҡәнәғәт булыу, сикләнеү **2.** (*кормиться*) туйынып тороу, тамаҡ аҫрау

**ПРОБА́ЛТЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **проболта́ться**

**ПРОБЕ́Г** *м* **1.** *см.* **пробежа́ть** – **пробега́ть** 1–3; **2.** *спорт.* ярыш, уҙыш, йүгереш; **автомоби́льный пробе́г** автомобилдәр ярышы **3.** *спец.* (*нахождение транспорта в пути*) юлда барыу (булыу) **4.** (*расстояние*) ара (юл) үтеү; **пробе́г в семьсо́т киломе́тров** ете йөҙ километр юл үтеү

**ПРОБЕ́ГАТЬ** *сов.* **1.** йүгереп (йүгергеләп) йөрөү, йөрөп ваҡыт үткәреү; **пробе́гать весь день** көнө буйы йүгереп йөрөү **2.** *что*; *разг.* (*пропустить*) йөрөп буш ҡалыу, йүгереп йөрөп -һыҙ/-һеҙ (-тан/-тән) ҡалыу; **пробе́гать обе́д** йүгереп йөрөп төшкө аштан ҡалыу **3.** *разг.* (*отсутствовать*) юғалып тороу, булмау, ҡайҙалыр сабыу (булыу)

**ПРОБЕГА́ТЬ** *несов. см.* **пробежа́ть**

**ПРОБЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** (*мимо кого-чего-л.*) йүгереп үтеү (уҙыу); **пробежа́ть ми́мо са́да** баҡса янынан йүгереп үтеү **2.** *что* и *без доп.* (*бегом продвинуться*) йүгереп үтеү (барыу), йүгереү, юл үтеү; **пробежа́ть за́ день два́дцать киломе́тров** бер көндә егерме километр йүгереү **3.** үтеү, сымырҙап (сағылып) китеү; (*о ветре*) иҫеп китеү; (*об облаках*) тиҙ-тиҙ ағылыу; (*о свете, тени*) бик тиҙ күсеү; (*об улыбке и т.п.*) сағылыу; **дрожь пробежа́ла по те́лу** тән сымырҙап китте **4.** (*протечь, пролиться*) ағыу, тамыу **5.** (*миновать – о времени*) бик тиҙ уҙыу, үтеп китеү **6.** *что*; *перен.*, *разг.* (*бегло прочесть*) тиҙ генә уҡып (ҡарап, күҙ йүгертеп) сығыу; **пробежа́ть письмо́ глаза́ми** хатҡа күҙ йүгертеп сығыу

**ПРОБЕЖА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йүгереп килеү (алыу); **пробежа́ться по са́ду** баҡса буйлап йүгереп килеү **2.** (*быстро проехать по земле – о самолёте*) үтеү, шәп барыу, йүгереп үтеү

**ПРОБЕ́Л** *м* **1.** (*пустое место в тексте*) буш урын, тултырылмаған урын; **оста́вить пробе́лы** буш урын ҡалдырыу **2.** (*недостаток, упущение*) етешһеҙлек, кәмселек; **пробе́лы в воспита́нии** тәрбиәләге етешһеҙлектәр

**ПРОБИВА́ТЬ** *несов. см.* **проби́ть** 1, 2

**ПРОБИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **проби́ться** 1–3, 5; **2.** *страд. от* **пробива́ть**

**ПРОБИВНО́Й,** -ая, -ое үтәләй тишеп сығыу ...ы; **пробивна́я си́ла снаря́да** туптың үтәләй тишеп сығыу көсө

**ПРОБИРА́ТЬ** *несов. см.* **пробра́ть**

**ПРОБИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пробра́ться** **2.** *страд. от* **пробира́ть**

**ПРОБИ́РКА** *ж* пробирка (*бер башы ябыҡ быяла көпшә*)

**ПРОБИ́РНЫЙ,** -ая, -ое һынау ...ы, проба ...ы; **проби́рное клеймо́** проба келәймәһе; **проби́рный ана́лиз** һынау өсөн үткәрелгән анализ ♦ **проби́рный ка́мень** *спец.* һынау ташы (*алтын-көмөштөң, платинаның сифатын билдәләү өсөн ҡулланыла торған махсус таш*)

**ПРОБИ́РОВАТЬ** *несов. что* **1.** (*определять количество драгоценных металлов*) проба алыу, пробаһын билдәләү **2.** (*клеймить*) проба һуғыу, пробалау, пробаһын күрһәтеү

**ПРОБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*сделать отверстие*) тишеп сығарыу, үтәләй тишеү; (*дверь, окно*) уйыу; **проби́ть сте́ну** стенаны тишеп сығыу **2.** *что*; *разг.* (*проложить дорогу*) юл ярыу, юл һалыу (үткәреү) **3.** *что*, *во что* ҡағыу; **проби́ть в гонг** шаң ҡағыу **4.** һуғыу, шылтырау; **часы́ проби́ли де́сять** сәғәт унды һуҡты ♦ **проби́ть себе́ доро́гу** үҙенә юл ярыу, уңышҡа ирешеү; **час про́бил!** сәғәте һуҡты! (*низҙер эшләргә ваҡыт етте*)

**ПРОБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*прорваться сквозь что-л.*) ярып (йырып) сығыу, юл һалып сығыу; **проби́ться сквозь толпу́** халыҡ төркөмөн йырып сығыу **2.** (*проступить*) шытып сығыу, (тишеп) сығыу; **трава́ проби́лась** үлән тишеп сыҡҡан; **проби́лись усы́** мыйыҡ сыҡты **3.** *перен.* (*проявиться – о чувствах, переживаниях*) бәреп сығыу, төҫөнә сығыу (*уй, тойғо тураһында*) **4.** *перен.*, *разг.* (*промучиться над чем-л.*) тырышыу, көс һалыу, маташыу **5.** *разг.* (*кое-как прожить*) тартып-һуҙып көн итеү ♦ **проби́ться в лю́ди** кеше булыу, аяҡҡа баҫыу

**ПРО́БКА** *ж* **1.** (*материал из коры пробкового дерева и др. растений*) кигермәк, күшкә, мәшкә, пробка **2.** (*затычка для закупоривания бу-*

*тылок и т.п.*) бөкө, тығын; **деревя́нная про́бка** ағас тығын; **про́бка радиа́тора** радиатор тығыны **3.** *эл.* һаҡлағыс, пробка; **про́бки перегоре́ли** пробкалар янды **4.** *перен.*, *разг.* (*скопление кого-чего-л.*) тығын, тығылыш; **на у́лице образова́лась про́бка** урамда тығылыш барлыҡҡа килде

**ПРО́БКОВЫЙ,** -ая, -ое кигермәк, мәшкә, күшкә, кигермәктән (мәшкәнән, күшкәнән) эшләнгән, пробка; **про́бковый шлем** пробка шлем; **про́бковый по́яс** кигермәктән эшләнгән билбау (*һыуға төшкәндә кейелә*) ♦ **про́бковый дуб** бөкө имәне (*ҡабығынан бөкө эшләнә торған мәңге йәшел ағас*)

**ПРОБЛЕ́МА** *ж* проблема, мәсьәлә; **пробле́мы воспита́ния** тәрбиә мәсьәләләре; **реши́ть пробле́му** мәсьәләне хәл итеү

**ПРОБЛЕМА́ТИКА** *ж* проблемалар, проблематика

**ПРОБЛЕМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*предположительный*) хәл ителмәгән, уйланылмаған, проблематик **2.** (*маловероятный*) шикле, икеле, ышанысһыҙ

**ПРОБЛЕМАТИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** (*предположительность*) проблемалылыҡ, хәл ителмәгәнлек **2.** (*маловероятность*) шиклелек, ышанысһыҙлыҡ

**ПРОБЛЕМАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **проблемати́ческий**

**ПРОБЛЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое проблемалы, проблема(лар) ҡуйылған; **пробле́мная статья́** проблема ҡуйылған мәҡәлә

**ПРО́БЛЕСК** *м* **1.** ялтылдау, сатҡы; **про́блески све́та** яҡтылыҡ сатҡыһы **2.** *обычно мн.* **про́блески**; *перен.* осҡон, билдә, сағылыш, сатҡы; **про́блески наде́жды** өмөт сатҡылары

**ПРОБЛЕ́СКИВАТЬ** и **ПРОБЛЁСКИВАТЬ** *несов. см.* **проблесну́ть**

**ПРОБЛЕСНУ́ТЬ** *сов.*; *прям.*, *перен.* ялтырап китеү, ялт итеп ҡалыу

**ПРОБЛУЖДА́ТЬ** *сов.* аҙашып йөрөү

**ПРО́БНИК: про́бник напряже́ния** *физ.* көсөргәнеш индикаторы (*прибор*)

**ПРО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** проба ...ы, һынау ...ы, пробаға алынған; **про́бная па́ртия това́ра** тауарҙың проба партияһы; **про́бная рабо́та** һынау эше **2.** (*с клеймом пробы*) пробалы, пробаһы күрһәтелгән; **про́бное серебро́** пробалы көмөш ♦ **про́бный ка́мень** һынау ташы (*һынар өсөн эшләнгән эш, хәл-ваҡиға һ.б.*)

**ПРО́БОВАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*испытывать*) һынау, һынап (тикшереп, самалап) ҡарау; **про́бовать свои́ си́лы** үҙ көсөңдө һынап ҡарау **2.** (*отведывать*) тәмләү, тәмләп (ашап, ҡабып, татып) ҡарау, ауыҙ итеү; **дава́ть про́бовать** ауыҙ иттереү; **про́бовать мёд** балды тәмләп ҡарау **3.** *с неопр.* (*пытаться сделать*) тырышыу, тырышып ҡарау, эшләп ҡарау, маташыу; **про́бовать вы́яснить** асыҡларға тырышыу

**ПРОБОДА́ТЬ** *сов.* һөҙөп тишеү, ярыу

**ПРОБОДЕ́НИЕ** *с*; *мед.* тишелеү, тишелеп сығыу

**ПРОБО́ИНА** *ж* тишек, ярыҡ, уйым; **пробо́ина от снаря́да** туп йәҙрәһенең тишеге

**ПРОБО́Й** *м* **1.** *см.* **проби́ть** — **пробива́ть** 1; **2.** (*дужка для навешивания замка*) күгән ҡаптырмаһы, элгес (келә) ҡаптырмаһы, күгән (элгес) ҡолағы (*күгәнде беркетеү тимере*) **3.** *эл.* тишеү (*электр көсөргәнеше тәьҫирендә изоляция тишелеү йәки ватылыу*)

**ПРОБО́ЙНИК** *м* тишкес (*инструмент*)

**ПРОБОЛЕ́ТЬ I** *сов.* ауырып алыу, күпмелер ауырып ятыу; **она́ проболе́ла па́ру дней** ул берике көн ауырып алды

**ПРОБОЛЕ́ТЬ II** *сов.* (*о части тела*) һыҙлау, ауыртып тороу; **рука́ проболе́ла ме́сяц** ҡул ай буйы һыҙланы

**ПРОБОЛТА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** һөйләшеү, лаҡылдап (лығырлап) ваҡыт уҙғарыу **2.** *что* и *без доп.* (*выболтать*) һөйләп ташлау (биреү, ысҡындырыу), әйтеп һалыу; **проболта́ть та́йну** серҙе һөйләп ташлау

**ПРОБОЛТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*проговориться*) серҙе (сисеү, асыу) һөйләп ташлау (әйтеп һалыу)

**ПРОБО́Р** *м* (сәс) ярып тарау; **прямо́й пробо́р** тура ярып тарау; **косо́й пробо́р** ҡыя ярып тарау

**ПРОБО́РКА** *ж* **1.** *см.* **пробра́ть** — **пробира́ть** 3; **2.** *разг.* (*выговор*) шелтә

**ПРОБОРМОТА́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* мығырлау, мығырлап ҡуйыу

**ПРОБОРОНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*обработать бороной*) тырмалап сығыу **2.** *что* и *без доп.* тырмалау, тырмалап үткәреү

**ПРО́БОЧНИК** *м*; *разг.* шешә тығынын асҡыс, бөкө һурғыс

**ПРОБРА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* (*о морозе, холоде*) ҡаплау, үтәнән-үтә һуғыу, үтеү; **моро́з пробра́л до косте́й** һыуыҡ һөйәккә үтте **2.** *кого*; *перен.*, *разг.* (*выбранить*) шелтәләү, шелтә биреү, бик ҡаты итеп әйтеү, быжғыртыу, кәрәген биреү **3.** *что*; *с.-х.* (*прополоть*) утау, утап сығыу ♦ **пробра́ть с песо́чком (песко́м)** *см.* **пробра́ть** 2

**ПРОБРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*пройти с трудом*) саҡ-саҡ үтеү, ауырлыҡ менән үтеү (йырып сығыу); **пробра́ться че́рез толпу́** халыҡ араһынан саҡ-саҡ үтеү **2.** (*пройти незаметно*) йәшеренеп үтеү, боҫоп (ҡасып) үтеү; **пробра́ться в ко́мнату че́рез окно́** бүлмәгә тәҙрә аша йәшеренеп инеү

**ПРОБРОДИ́ТЬ** *сов.* ҡыҙырып йөрөү, (ваҡытты) йөрөп уҙғарыу

**ПРОБУДИ́ТЬ** *сов.*; *высок.* **1.** *кого-что* (*разбудить*) уятыу, йоҡонан торғоҙоу **2.** *кого-что*; *перен.* (*сделать деятельным*) уятыу, хәрәкәткә килтереү, дәртләндереү **3.** *что*; *перен.* (*возбу-*

*дить чувства, желания и т.п.*) тыуҙырыу, ҡабыҙыу, уятыу; **пробуди́ть жела́ние** дәрт уятыу

**ПРОБУДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *высок.* **1.** (*проснуться*) уяныу, йоҡонан уяныу; (*о природе*) йәнләнеү **2.** *перен.* (*возникнуть — о чувстве, желании*) уяныу, тыуыу; **пробуди́лось жела́ние** теләк уянды (тыуҙы) **3.** *перен.* уяныу, дәртләнеү, хәрәкәткә килеү

**ПРОБУЖДА́ТЬ** *несов. см.* **пробуди́ть**

**ПРОБУЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пробуди́ться 2.** *страд. от* **пробужда́ть**

**ПРОБУЖДЕ́НИЕ** *с см.* **пробуди́ть — пробужда́ть, пробуди́ться — пробужда́ться; пробужде́ние созна́ния у ребёнка** баланың аңы уяныу

**ПРОБУРА́ВИТЬ** *сов. что* быраулап (үтәләй) тишеү, быраулау, (бырау менән) тишеп сығарыу

**ПРОБУРА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **пробура́вить**

**ПРОБУРИ́ТЬ** *сов. что* быраулау, быраулап тишеү; **пробури́ть нефтяну́ю сква́жину** нефть скважинаһын быраулау

**ПРОБУРЧА́ТЬ** *сов.* и *без доп.*; *разг.* мығырлау, мығырлап ҡуйыу (үткәреү)

**ПРОБЫ́ТЬ** *сов.* тороу, булыу, ваҡыт үткәреү; **пробы́ть в го́роде пять дней** ҡалала биш көн булыу

**ПРОВА́Л** *м* **1.** *см.* **провали́ть — прова́ливать** 1, **провали́ться — прова́ливаться** 1, 2, 5; **2.** (*углубление*) упҡан (емерек) урын, убылған соҡор **3.** *перен.*, *разг.* уңмау, уңышһыҙлыҡҡа осрау (дусар булыу); **прова́л на экза́мене** имтиханда уңышһыҙлыҡҡа осрау **4.** (*раскрытие, обнаружение*) асылыу, тотолоу

**ПРОВА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **провали́ть**

**ПРОВА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **провали́ться 2.** *страд. от* **прова́ливать**

**ПРОВАЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*обрушить*) емереү, ауҙарыу, емереп төшөрөү; **провали́ть кры́шу** ҡыйыҡты емереп төшөрөү **2.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* (*привести к провалу*) боҙоу, уңышһыҙлыҡҡа дусар итеү, башҡарып сыға алмау; **провали́ть роль** ролде башҡарып сыға алмау; **провали́ть де́ло** эште юҡҡа сығарыу **3.** *кого*; *перен.*, *разг.* (*на экзамене*) (имтиханда) үткәрмәү **4.** *кого-что*; *разг.* (*раскрыть подпольную организацию и т.п.*) асыу, тотоу **5.** *кого-что*; *разг.* (*отвергнуть*) үткәрмәү, кире ҡағыу; **провали́ть прое́кт** проектты үткәрмәү

**ПРОВАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*упасть, рухнуть*) төшөп китеү, ауып (тәгәрәп) төшөү; **провали́ться в я́му** соҡорға төшөп китеү **2.** (*обрушиться*) емерелеү, уйылыу, һеңеү; **лёд провали́лся под нога́ми** аяҡ аҫтында боҙ уйылды **3.** *перен.*, *разг.* (*потерпеть неудачу*) уңмау, юҡҡа сығыу, уңышһыҙлыҡҡа осрау; **де́ло провали́лось** эш юҡҡа сыҡты **4.** *перен.*; *разг.* (имтихан) тота алмау (бирә алмау); **провали́ться на хи́мии** химиянан имтихан бирә алмау **5.** (*ввалиться — о глазах, щеках*) батыу, күҙ ултырыу (төпкә төшөү) **6.** (*быть обнаруженным*) асылыу, тотолоу **7.** *перен.*, *прост.* (*пропасть, исчезнуть*) олағыу, юҡҡа сығыу ♦ **как (то́чно) сквозь зе́млю провали́лся** юғалыу, юҡҡа сығыу, ергә һеңгән кеүек юҡ булыу; **гото́в (рад) сквозь зе́млю провали́ться** оятынан ер тишегенә инерҙәй булыу; **провали́сь я (провали́ться мне) на э́том ме́сте!** *прост.* ер упһын! (*ант иткәндә*)

**ПРОВАЛЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** аунау, аунап (ятып) үткәреү; **проваля́ться в посте́ли** урында аунау **2.** (*пролежать без употребления*) буталып ятыу

**ПРОВАНСА́ЛЬ** *м*; *кулин.* провансаль (*йомортҡа һарыһына цәмлек майы ҡушып яһалған соус*)

**ПРОВА́НСКИЙ: прова́нское ма́сло** зәйтүн майының юғары сорты

**ПРОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **провари́ть** 1

**ПРОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **провари́ться** 1; **2.** *страд. от* **прова́ривать**

**ПРОВАРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*довести до готовности*) бешереп еткереү, бешкәнсе ҡайнатыу; **провари́ть мя́со** итте бешереп еткереү **2.** *что* и *без доп.* (*варить в течение какого-л. времени*) (бер аҙ ваҡыт) ҡайнатыу, бешерә (ҡайната) биреү

**ПРОВАРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бешеп өлгөрөү (сығыу, етеү); **ры́ба провари́лась** балыҡ бешеп етте **2.** (*в течение какого-л. времени*) ҡайнап бешеп ултырыу

**ПРОВЕ́ДАТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что* (*навестить*) килеп хәлен белеү, хәл белешеү, күреп китеү; **прове́дать родны́х** туғандарҙың хәлен белеү **2.** *что, о ком-чём* (*узнать*) белеү, белешеү, һорашып белеү

**ПРОВЕДЕ́НИЕ** *с см.* **провести́ — проводи́ть** 1, 3—5, 7, 8; **проведе́ние в жизнь поли́тики ми́ра** тыныслыҡ сәйәсәтен тормошҡа ашырыу

**ПРОВЕ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **прове́дать**

**ПРОВЕЗТИ́** *сов. кого-что* **1.** (һалып, тейәп) алып барыу (килеү); **провезти́ че́рез лес** урман аша алып барыу **2.** (*проехать, доставляя кого-что-л.*) алып барыу (килеү), килтереү, илтеү, ташыу, йөрөтөү

**ПРОВЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **прове́ять**

**ПРОВЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прове́яться 2.** *страд. от* **прове́ивать**

**ПРОВЕНТИЛИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **вентили́ровать**

**ПРОВЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **прове́рить 2.** *прил.* һыналған, тикшерелгән, ышаныслы; **прове́ренный челове́к** һыналған кеше; **прове́ренные да́нные** ышаныслы мәғлүмәттәр

**ПРОВЕ́РИТЬ** *сов. кого-что* **1.** тикшереү, тикшереп сығыу, барлау; **прове́рить выполне́ние пла́на** план үтәлешен тикшереү; **прове́рить биле́ты** билеттарҙы тикшереү; **тща́тельно прове-**

**ря́ть** ныҡлап тикшереү **2.** һынау, һынап (тикшереп) ҡарау, тикшереү; **прове́рить зна́ния** белем тикшереп ҡарау

**ПРОВЕ́РИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*пройти проверку*) тикшерелеү, ҡаралыу, күренеү; **прове́риться у врача́** табипҡа күренеү **2.** (исемлектән) тикшереү, үҙеңде ҡарау (эҙләү); **прове́риться в спи́ске избира́телей** һайлаусылар исемлегенән үҙеңде ҡарау

**ПРОВЕ́РКА** *ж см.* **прове́рить — проверя́ть, прове́риться — проверя́ться**; **прове́рка докуме́нта** документ тикшереү; **вы́борочная прове́рка** һайланма тикшереү

**ПРОВЕРНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*просверлить*) тишеү, быраулап тишеү, тишек тишеү **2.** *разг.* (*измельчить*) үткәреү, турап (ваҡлап) сығарыу **3.** *перен.*, *прост.* (*быстро сделать*) тиҙ генә эшләп алыу (ташлау), тиҙ генә -ып/-еп алыу (ташлау); **проверну́ть де́ло** эште тиҙ генә эшләп ташлау

**ПРОВЕ́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое тикшереү ...ы, һынау ...ы; **прове́рочный дикта́нт** һынау диктанты; **прове́рочная коми́ссия** тикшереү комиссияһы

**ПРОВЕРТЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* (быраулап) тишеү, тишек тишеү

**ПРОВЕРТЕ́ТЬСЯ** *сов.* әйләнеү, әйләнеп тороу; **колесо́ провертéлось не́сколько мину́т** ҡуласа бер нисә минут әйләнде

**ПРОВЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **проверну́ть** 1, 2

**ПРОВЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **прове́рить**

**ПРОВЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прове́риться** **2.** *страд. от* **проверя́ть**

**ПРОВЕ́С I** *м*; *торг.* (*недостаток в весе*) (үлсәүҙәге) кәмлек (етмәү), кәм сығыу; **три килогра́мма прове́са** өс килограмға кәм сығыу

**ПРОВЕ́С II** *м* (*провисшее место*) һалынҡыланыу, эйелгән (бөгөлгән) урын; **прове́с проводо́в** сымдарҙың һалынҡыланыуы

**ПРОВЕ́СИТЬ I** *сов. что*; *торг.* (*недовесить*) үлсәүҙә яңылышыу, кәм үлсәү

**ПРОВЕ́СИТЬ II** *сов. что* **1.** (*просушить на воздухе*) элеп киптереү, ҡаҡлау **2.** *спец.* (*проверить прямизну чего-л.*) тигеҙләү, тигеҙлеген тикшереү (үлсәү)

**ПРОВЕ́СИТЬСЯ I** *сов.*; *торг.* (яңылыш) кәм үлсәнеү

**ПРОВЕ́СИТЬСЯ II** *сов.* **1.** (*провялиться*) ҡаҡланыу, һауала кибеү **2.** (*провиснуть*) һығылып һалыныу, һалынып (эйелеп, бөгөлөп) төшөү

**ПРОВЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* алып инеү, алып сығыу, уҙғарыу; **провести́ госте́й в ко́мнату** ҡунаҡтарҙы бүлмәгә алып инеү; **провести́ отря́д че́рез го́ры** отрядты тау аша алып сығыу **2.** *чем, по чему* һыпырыу, һыпырып ебәреү (ҡуйыу); **провести́ руко́й по волоса́м** сәсте ҡул менән һыпырыу **3.** *что* (*прочертить*) һыҙыу, үткәреү, һалыу; **провести́ ли́нию** һыҙыҡ үткәреү **4.** *что* (*проложить*) үткәреү, һалыу; **провести́ желе́зную доро́гу** тимер юл һалыу; **провести́ телефо́н** телефон үткәреү **5.** *что* (*осуществить*) уҙғарыу, үткәреү, тормошҡа ашырыу; **провести ́опыт** тәжрибә үткәреү **6.** *что* уҙғарыу, үткәреү; **ве́село провести́ пра́здник** байрамды күңелле үткәреү **7.** *что* (*выдвинуть, добиться утверждения чего-л.*) үткәреү, бойомға (тормошҡа) ашырыу, раҫлатыу; **провести́ иде́ю в жизнь** идеяны тормошҡа ашырыу **8.** *что* (*оформить*) үткәреү, уҙғарыу; **провести́ расхо́д по ка́ссе** сығымды касса аша уҙғарыу **9.** *кого*; *разг.* (*обмануть*) алдау, ултыртыу

**ПРОВЕ́ТРИВАНИЕ** *с см.* **прове́тривать, прове́триваться**; **прове́тривание ко́мнаты** бүлмәне елләтеү

**ПРОВЕ́ТРИВАТЬ** *несов. см.* **прове́трить**

**ПРОВЕ́ТРИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прове́триться** **2.** *страд. от* **прове́тривать**

**ПРОВЕ́ТРИТЬ** *сов. что* **1.** елләтеү, елләтеп алыу, һауаны алмаштырыу; **прове́трить зал** залды елләтеү **2.** *перен.* донъя күрһәтеп килеү, күңелен асыу

**ПРОВЕ́ТРИТЬСЯ** *сов.* **1.** елләү, һауа алмашыныу; **ко́мната прове́трилась** бүлмә елләне **2.** (*побыть на свежем воздухе*) саф һауала йөрөп килеү, һауа алмаштырып килеү **3.** *перен.*, *разг.* (*развлечься*) донъя күреп (күңел асып) килеү

**ПРОВЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **прове́сить** I

**ПРОВЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **прове́сить** II

**ПРОВЕ́ШИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **прове́ситься** I; **2.** *страд. от* **прове́шивать** I

**ПРОВЕ́ШИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **прове́ситься** II; **2.** *страд. от* **прове́шивать** II

**ПРОВЕ́ЯТЬ** *сов. что* елгәреү, елгәреп алыу, елгәреп ҡуйыу

**ПРОВЕ́ЯТЬСЯ** *сов.* елгәрелеү; **зерно́ прове́ялось** ашлыҡ елгәрелде

**ПРОВИА́НТ** *м* аҙыҡ-түлек

**ПРОВИ́ДЕНИЕ** *с*; *книжн.* алдан күреү; **дар прови́дения** алдан күреү һәләте

**ПРОВИДЕ́НИЕ** *с*; *рел.* тәҡдир, яҙмыш, алла ҡөҙрәте

**ПРОВИ́ДЕТЬ** *несов. что*; *книжн.* (алдағыны) күҙ алдына килтереү, киләсәкте күреү (белеү)

**ПРОВИ́ДЕЦ** *м* и **ПРОВИ́ДИЦА** *ж*; *книжн.* алдан күреүсе, алдан күрә белеүсе, әүлиә

**ПРОВИ́ЗИЯ** *ж* аҙыҡ, ашамлыҡ, аҙыҡ-түлек

**ПРОВИ́ЗОР** *м* провизор (*квалификациялы дарыухана хеҙмәткәре*)

**ПРОВИНИ́ТЬСЯ** *сов. в чём, чем* хата (яңылышлыҡ) эшләү, яҙыҡлыҡ ҡылыу

**ПРОВИ́ННОСТЬ** *ж*; *разг.* ғәйеп, яҙыҡлыҡ, хата

**ПРОВИНЦИА́Л** *м* и **ПРОВИНЦИА́ЛКА** *ж* провинция кешеһе, төпкөлдә йәшәүсе (*үҙәктән ситтә йәшәүсе*)

**ПРОВИНЦИАЛИ́ЗМ** *м* **1.** (*взгляды, привычки, присущие жителям провинции*) провинциаллыҡ, томаналыҡ **2.** (*местное просторечие*) провинциализм, төбәк һүҙе, ерле һөйләш

**ПРОВИНЦИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** провинция …ы, төбәктә йәшәгән (торған, булған, эшләгән); **провинциа́льный го́род** провинция ҡалаһы **2.** провинциаль (*провинцияға хас булған*); **провинциа́льные нра́вы** провинциаль ғәҙәттәр

**ПРОВИ́НЦИЯ** *ж* провинция (**1.** *ҙур ҡалаларҙан ситтә ятҡан урын, периферия* **2.** *ҡайһы бер илдәрҙә административ берәмек* **3.** *тар. боронғо римляндар баҫып алған территория*)

**ПРОВИСА́ТЬ** *несов. см.* **прови́снуть**

**ПРОВИСЕ́ТЬ** *сов.* эленеп тороу; **бельё провисе́ло це́лый день** кер көн буйы эленеп торҙо

**ПРОВИ́СНУТЬ** *сов.* һалыныу, һалынып тороу (бөгөлөп төшөү)

**ПРО́ВОД** *м*; *тех.* сым, үткәргес; **соедини́тельные провода́** тоташтырғыс сымдар; **телефо́нный про́вод** телефон сымы

**ПРОВОДИ́МОСТЬ** *ж* **1.** *спец.* үткәреүсәнлек (*электр тогын, йылылыҡты, тауышты һ.б. үткәреү сифаты*); **проводи́мость мета́лла** металдың үткәреүсәнлеге **2.** *биол.* үткәреүсәнлек (*ниндәй ҙә булһа ярһыуҙы, импульсты үткәреү һәләте*); **не́рвная проводи́мость** нервы үткәреүсәнлеге

**ПРОВОДИ́ТЬ I** *несов.* **1.** *см.* **провести́** **2.** *что*; *спец.* үткәреү; **медь хорошо́ прово́дит тепло́** еҙ йылыны яҡшы үткәрә

**ПРОВОДИ́ТЬ II** *сов. кого-что*; *в разн. знач.* оҙатыу; **проводи́ть сы́на в а́рмию** улын армияға оҙатыу; **проводи́ть в доро́гу** юлға оҙатыу ♦ **проводи́ть в жизнь** тормошҡа ашырыу

**ПРОВОДИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **проводи́ть** I

**ПРОВО́ДКА** *ж* **1.** *см.* **провести́** 1, 4, 8 – **проводи́ть** I; **прово́дка судо́в** судноларҙы үткәреү **2.** (*сеть проводов*) сым үткәргестәр, тимерсыбыҡтар селтәре **3.** *спец.* ат йөрөтөү, атты йөрөтөп һыуындырыу; **прово́дка лошаде́й по́сле езды́** юлдан ҡайтҡан аттарҙы йөрөтөп һыуындырыу

**ПРОВОДНИ́К I** *м* **1.** *физ.* үткәргес, йүнәлдергес (*электр тогы һ.б. үткәреүсе матдә*); **проводни́к тепла́** йылы үткәргес **2.** *перен.* (*посредник в распространении чего-л.*) таратыусы, йәйелдереүсе, үткәреүсе; **проводни́к культу́ры** мәҙәниәт таратыусы

**ПРОВОДНИ́К II** *м* и **ПРОВОДНИ́ЦА** *ж* **1.** (*провожатый*) юл күрһәтеүсе, оҙатыусы, оҙата барыусы; **наня́ть проводника́** юл күрһәтеүсе яллау **2.** *ж.-д.* вагон ҡараусы; **проводни́к мя́гкого ваго́на** йомшаҡ вагондың ҡараусыһы

**ПРО́ВОДЫ** *только мн.* оҙатыу; **про́воды зимы́** ҡышты оҙатыу (*байрам*); **про́воды в а́рмию** армияға оҙатыу

**ПРОВОЖА́ТЫЙ** *м* юл күрһәтеүсе, оҙатыусы, оҙата барыусы

**ПРОВОЖА́ТЬ** *несов. см.* **проводи́ть** II

**ПРОВО́З** *м см.* **провезти́** – **провози́ть** I; **прово́з багажа́** багаж ташыу; **пла́та за прово́з** алып килеү хаҡы

**ПРОВОЗВЕ́СТНИК** *м* и **ПРОВОЗВЕ́СТНИЦА** *ж*; *высок.* **1.** (*предсказатель, предсказательница*) алдан хәбәр биреүсе, киләсәктән хәбәр биреүсе **2.** (*тот* (*та*), *кто провозглашает что-л.*) тантаналы хәбәр итеүсе

**ПРОВОЗГЛАСИ́ТЬ** *сов. кого-что* иғлан итеү, әйтеү; **провозгласи́ть незави́симость** бойондороҡһоҙлоҡ иғлан итеү; **провозгласи́ть ло́зунг** лозунг иғлан итеү; **провозгласи́ть тост** тост әйтеү

**ПРОВОЗГЛАША́ТЬ** *несов. см.* **провозгласи́ть**

**ПРОВОЗГЛАШЕ́НИЕ** *с см.* **провозгласи́ть** – **провозглаша́ть**; **провозглаше́ние манифе́ста** манифест иғлан итеү

**ПРОВОЗИ́ТЬ I** *несов. см.* **провезти́**

**ПРОВОЗИ́ТЬ II** *сов. кого-что* (*в течение какого-л. времени*) аҙыраҡ (бер аҙ) ташыу, тейәп йөрөтөү

**ПРОВОЗИ́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* **1.** маташыу; **провози́ться всю ночь с больны́ми** төн буйы ауырыуҙар менән маташыу **2.** йөрөү, йүгерешеү; **ребя́та весь день провози́лись в саду́** балалар көнө буйы баҡсала йөрөнө

**ПРОВОЗИ́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **провози́ть** I

**ПРОВОЗНО́Й,** -ая, -ое йөрөтөү …ы, килтереү …ы, алып барыу …ы; **провозна́я пла́та** килтереү хаҡы

**ПРОВОКА́ТОР** *м* и *разг.* **ПРОВОКА́ТОРША** *ж* **1.** йәшерен агент **2.** (*подстрекатель*) ҡотҡосо, ҡотҡо башы, ҡотортоусы

**ПРОВОКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое провокация …ы, провокацион, ҡотҡоға нигеҙләнгән; **провокацио́нные де́йствия** провокацион эш-ҡылыҡ

**ПРОВОКА́ЦИЯ** *ж* **1.** (*агрессивное действия*) провокация **2.** (*подстрекательство*) ҡотҡо, ҡотортоу, ҡотҡо һалыу; **вое́нная провока́ция** һуғыш провокацияһы; **подда́ться на провока́цию** ҡотҡоға бирелеү **3.** *мед.* провокация, уятыу, ҡуҙғытыу (*сирҙе яһалма рәүештә булдырыу*)

**ПРО́ВОЛОКА** *ж* сым, тимерсыбыҡ; **ме́дная про́волока** баҡыр сым; **протя́гивать про́волоку** сым һуҙыу

**ПРОВОЛОЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *см.* **проволо́чь** **2.** (*промедлить*) эшләмәй һуҙыу (һалып ҡуйыу)

**ПРО́ВОЛОЧКА** *ж* нескә сым, нәҙек тимерсыбыҡ

**ПРОВОЛО́ЧКА** *ж*; *разг.* тоткарлыҡ, ҡамасаулыҡ, ҡамасау

**ПРО́ВОЛОЧНИК** *м* ҡаты ҡорт (*ҡоротҡос бөжәк*)

**ПРО́ВОЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое сым ...ы, тимерсыбыҡ ...ы; **про́волочное произво́дство** сым етештереү; **про́волочная и́згородь** сым кәртә

**ПРОВОЛО́ЧЬ** *сов.* һөйрәкләп (һөйрәтеп, һөйрәп) алып барыу

**ПРОВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.*; *тех.* боролоу, боролоп тороу (*бер урында*)

**ПРОВО́РНО** *нареч.* йылдам, етеҙ, сос, шәп; **шага́ть прово́рно** йылдам атлау

**ПРОВО́РНОСТЬ** *ж* етеҙлек, йылғырлыҡ, сослоҡ, йылдамлыҡ, осҡорлоҡ; **прояви́ть прово́рность в де́ле** эштә йылғырлыҡ күрһәтеү

**ПРОВО́РНЫЙ,** -ая, -ое етеҙ, йылғыр, сос, осҡор, йылдам, шәп; **быть прово́рным** етеҙ булыу; **прово́рный челове́к** йылғыр кеше

**ПРОВОРОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* урлай торғас тотолоу, урлашып эләгеү

**ПРОВОРО́НИТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* һемәйеп ҡалыу, аңшайып ҡалыу

**ПРОВО́РСТВО** *с* сослоҡ, етеҙлек, өлгөрлөк, йылғырлыҡ; **проявля́ть прово́рство** сослоҡ күрһәтеү

**ПРОВОРЧА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ырылдап ҡуйыу, мығырлау; **он что́-то проворча́л** ул нимәлер мығырлап ҡуйҙы **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*в течение какого-л. времени*) һуҡраныу, мығырлау; **она́ проворча́ла це́лый день** ул көн буйы һуҡранды

**ПРОВОЦИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* **1.** *кого-что* (*подстрекнуть на действия*) юрый ҡотортоу, ҡотҡо таратыу **2.** *что*; *мед.* уятыу, ҡуҙғытыу **3.** *что* (*умышленно вызвать событие*) ҡотҡо һалыу

**ПРОВОЩИ́ТЬ** *сов. что* балауыҙлау, балауыҙ һөртөү

**ПРОВЯ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **провя́лить**

**ПРОВЯ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **провя́литься 2.** *страд. от* **провя́ливать**

**ПРОВЯ́ЛИТЬ** *сов. что* ҡаҡлау, киптереү; **провя́лить мя́со** ит ҡаҡлау

**ПРОВЯ́ЛИТЬСЯ** *сов.* ҡаҡланыу, һауала (елгә) кибеү

**ПРОГАДА́ТЬ** *сов.*; *разг.* (*ошибиться в расчётах*) яңылышыу, отолоу, иҫәпләгәнсә барып сыҡмау

**ПРОГА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **прогада́ть**

**ПРОГА́ЛИНА** *ж*; *разг.* **1.** (*в лесу*) аҡлан, урмандағы асыҡлыҡ (ялан) **2.** (*промежуток между чем-л.*) ара, аралыҡ

**ПРОГИ́Б** *м* **1.** *см.* **прогну́ть — прогиба́ть, прогну́ться — прогиба́ться**; **проги́б потолка́** түшәмдең һығылып төшөүе **2.** (*место*) бөгөм, бөгөлгән (һығылған) урын

**ПРОГИБА́ТЬ** *несов. см.* **прогну́ть**

**ПРОГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прогну́ться 2.** *страд. от* **прогиба́ть**

**ПРОГЛА́ДИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*разгладить*) үтекләү, үтекләп сығыу (бөтөү) **2.** *что* и *без доп.* (*некоторое время*) үтекләп алыу (тороу)

**ПРОГЛА́ДИТЬСЯ** *сов.* үтекләнеү

**ПРОГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **прогла́дить** 1

**ПРОГЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прогла́диться 2.** *страд. от* **прогла́живать**

**ПРОГЛА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **проглоти́ть**

**ПРОГЛОТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* йотоп ебәреү, йотоу; **проглоти́ть мя́со** итте йотоп ебәреү **2.** *что*; *перен.*, *разг.* белдермәү, һиҙҙермәү, йотоу, йомоу; **проглоти́ть оби́ду** үпкәне белдермәү **3.** *что*; *перен.*, *разг.* (*сказать невнятно*) йотоу, йотоп һөйләү **4.** *что*; *перен.*, *разг.* һыу кеүек эсеү, бер тынала (бик шәп) уҡыу; **я проглоти́ла э́ту кни́гу за́ день** был китапты бер тынала уҡып сыҡтым ♦ **проглоти́ть язы́к** телде йотоу, өндәшмәү, һөйләшмәү; **язы́к прогло́тишь** телеңде йоторһоң, бик тәмле; **как (сло́вно, бу́дто) арши́н проглоти́л** *см.* **арши́н**

**ПРОГЛЯДЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* (*пропустить*) күрмәү, күрмәй (белмәй) ҡалыу; **прогляде́ть опеча́тку** хәреф хатаһын күрмәй ҡалыу **2.** *что*; *разг.* (*бегло просмотреть*) күҙ йүгертеп сығыу, күҙҙән кисереү, ҡараштырыу, ҡараштырып сығыу; **прогляде́ть газе́ты** гәзиттәрҙе ҡараштырыу **3.** (*рассматривать некоторое время*) ҡарап тороу, оҙаҡ ҡарау ♦ **прогляде́ть (все) глаза́** *см.* **глаз**

**ПРОГЛЯ́ДЫВАТЬ I** *несов. см.* **прогляде́ть** 2

**ПРОГЛЯ́ДЫВАТЬ II** *несов. см.* **проглянуть**

**ПРОГЛЯНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *разг.*, *уст.* күҙен асып ҡарау, күҙен асыу **2.** (*показаться*) күренеү, күренеп китеү, күҙгә салыныу; (*о чувстве*) һиҙелеү; **проглянула луна́** ай күренде; **во взгля́де проглянула трево́га** ҡарашында шомланыу һиҙелде

**ПРОГНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡыуыу, ҡыуып ебәреү; **прогна́ть плоты́** һал ҡыуыу **2.** *кого* ҡыуып сығарыу (ебәреү), ҡыуыу; **прогна́ть и́з дому** өйҙән ҡыуып сығарыу; **прогна́ть с рабо́ты** эштән ҡыуып сығарыу; **прогна́ть соба́ку** этте ҡыуып ебәреү **3.** *что*, *через что* үткәреү, аша (буйлап) алып сығыу; **прогна́ть ста́до че́рез дере́вню** көтөүҙе ауыл аша алып сығыу **4.** *что*; *перен.*, *разг.* (*избавиться от чего-л.*) ҡыуыу, таратыу, ҡотолоу; **прогна́ть ску́ку** күңелһеҙлектән ҡотолоу

**ПРОГНЕ́ВАТЬ** *сов. кого*; *уст.* асыуландырыу, асыуын килтереү

**ПРОГНЕ́ВАТЬСЯ** *сов.*; *уст. см.* **гне́ваться**

**ПРОГНЕВИ́ТЬ** *сов. см.* **прогне́вать**

**ПРОГНИВА́ТЬ** *несов. см.* **прогни́ть**

**ПРОГНИ́ТЬ** *сов.* сереп бөтөү, үтәнән-үтәгә (тотош) сереү

**ПРОГНО́З** *м* алдан әйтеү, алдан әйтеп ҡуйыу; **прогно́з пого́ды** һауа торошон алдан әйтеү; **прогно́з боле́зни** *мед.* ауырыуҙың барышын алдан билдәләү

**ПРОГНОЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* прогноз яһау, алдан әйтеү, алдан әйтеп ҡуйыу

**ПРОГНУ́ТЬ** *сов. что* бөгөү, эйелдереү, һығып төшөрөү; **прогну́ть пол** иҙәнде эйелдереү

**ПРОГНУ́ТЬСЯ** *сов.* бөгөлөү, һығылыу, ҡайышыу; **полови́ца прогну́лась** иҙән таҡтаһы ҡайышҡан

**ПРОГОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **проговори́ть** 1

**ПРОГОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **проговори́ться** **2.** *страд. от* **проговва́ривать**

**ПРОГОВОРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*произнести*) әйтеп алыу (ҡуйыу), әйтеү **2.** (*некоторое время*) һөйләшеп (ваҡыт) уҙғарыу

**ПРОГОВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* ысҡындырыу, әйтеп (артыҡ һөйләп) ташлау; **проговори́ться о свои́х наме́рениях** үҙ уйҙарын һөйләп ташлау

**ПРОГОЛОДА́ТЬСЯ** *сов.* асығыу, ашағы килеү; **де́ти проголода́лись** балалар асыҡты

**ПРОГОЛОСОВА́ТЬ** *сов. см.* **голосова́ть**

**ПРОГО́Н I** *м см.* **1. прогна́ть** — **прогоня́ть** 1; **прого́н скота́** малдарҙы ҡыуыу **2.** (*дорога для выгона скота*) көтөү юлы **3.** *спец.* (*просмотр спектакля, фильма*) ҡарап сығыу, тотош ҡарау

**ПРОГО́Н II** *м*; *архит.* (*опорная балка*) өрлөк

**ПРОГОНЯ́ТЬ I** *несов. см.* **прогна́ть**

**ПРОГОНЯ́ТЬ II** *сов. кого-что* и *без доп.*; *разг.* ҡыуалау, ҡыуып йөрөтөү; **прогоня́ть маши́ну це́лый день** машинаны көн буйы ҡыуып йөрөтөү

**ПРОГОРА́ТЬ** *несов. см.* **прогоре́ть** 1—3

**ПРОГОРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*выгореть до дыр*) янып тишелеү, тишелгәнсе яныу; **сковорода́ прогоре́ла** таба тишелгәнсе янған **2.** (*сгореть*) янып бөтөү; **дрова́ прогоре́ли** утын янып бөттө **3.** *перен., разг.* (*обанкротиться*) яныу, юҡҡа сығыу; **моё де́ло прогоре́ло** минең эш янды **4.** (*быть зажжённым в течение какого-л. времени*) янып үткәреү, янып ултырыу (тороу); **ла́мпа прогоре́ла всю ночь** лампа төн буйына янып ултырҙы

**ПРОГО́РКЛЫЙ,** -ая, -ое әсегән, иҫкергән, әсе тәм ингән (*боҙолоуҙан*); **прого́ркло́е ма́сло** әсегән май

**ПРОГО́РКНУТЬ** *сов.* әсеү, әсе тәм инеү, боҙолоу, иҫкереү

**ПРОГОСТИ́ТЬ** *сов.* ҡунаҡ булыу (булып ятыу)

**ПРОГРА́ММА** *м*; *в разн. знач.* программа; **програ́мма радиопереда́ч** радио тапшырыуҙар программаһы; **уче́бная програ́мма** уҡыу программаһы; **програ́мма по матема́тике** математика буйынса программа; **програ́мма конце́рта** концерт программаһы; **програ́мма па́ртии** фирҡәнең программаһы

**ПРОГРАММИ́РОВАНИЕ** *с*; *спец.* **1.** *см.* **программи́ровать** **2.** (*раздел прикладной математики*) программалау

**ПРОГРАММИ́РОВАТЬ** *несов. что*; *спец.* программалау, программа төҙөү (*электрон хисаплау машиналарында*)

**ПРОГРА́ММНЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* программа ...ы; **обсужде́ние програ́ммных вопро́сов** программа мәсьәләләрен тикшереү; **програ́ммное выступле́ние** программа рәүешендәге сығыш

**ПРОГРЕВА́ТЕЛЬ** *м*; *тех.* ҡыҙҙырғыс, йылытҡыс

**ПРОГРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **прогре́ть**

**ПРОГРЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прогре́ться** **2.** *страд. от* **прогрева́ть**

**ПРОГРЕМЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*прогрохотать*) дөбөрләү, даңғыр-доңғор килеү (итеү), шалтырау, шалтыратыу, даңғырлау, доңғорлау; (*о громе*) күкрәү, гөрөлдәү; (*о выстреле*) яңғырау; **прогреме́л гром** күк күкрәне; **прогреме́ть ключа́ми** асҡыстарҙы шалтыратыу; **прогреме́ла теле́га** арба даңғыр-доңғор уҙып китте **2.** *перен.* (*прославиться*) яңғырау, шаулау, даны таралыу; **их имена́ прогреме́ли** уларҙың исеме шауланы

**ПРОГРЕ́СС** *м* прогресс, алға барыш, алға китеш, үҫеш; **прогре́сс те́хники** техниканың үҫә барыуы; **идти́ по пути́ прогре́сса** үҫеш юлы менән барыу

**ПРОГРЕССИ́ВНОСТЬ** *ж* алдынғылыҡ, прогрессивлыҡ; **прогресси́вность иде́й** идеяның алдынғылығы

**ПРОГРЕССИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*постепенно возрастающий*) үҫә барған, арта бара торған, прогрессив; **прогресси́вная опла́та труда́** хеҙмәткә прогрессив түләү **2.** (*передовой*) алдынғы, прогрессив; **прогресси́вный взгляд** алдынғы ҡараш; **прогресси́вное о́бщество** алдынғы йәмғиәт; **прогресси́вный де́ятель** прогрессив эшмәкәр

**ПРОГРЕССИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** (*постепенно усиливаться*) көсәйеү, көсәйә барыу; **боле́знь прогресси́рует** ауырыу көсәйә **2.** (*совершенствоваться*) алға барыу (китеү), үҫеү

**ПРОГРЕ́ССИЯ** *ж*; *мат.* прогрессия, алға барыу, күбәйеү (*арта йәки кәмей барыусы һандар рәте*); **геометри́ческая прогре́ссия** геометрик прогрессия

**ПРОГРЕ́ТЬ** *сов. что* үтәнән-үтә йылытыу, яғып ныҡ йылытыу, ҡыҙҙырыу

**ПРОГРЕ́ТЬСЯ** *сов.* үтәнән-үтә йылыныу, ныҡ йылыныу, ҡыҙыу

**ПРОГРОМЫХА́ТЬ** *сов.*; *разг.* дөбөрләү, дөбөр-шатыр итеү, дығырлап үтеп китеү, күкрәү, яңғырау; **прогромыха́л гром** дөбөр-шатыр итеп күк күкрәне

**ПРОГРОХОТА́ТЬ** *сов.*; *разг.* гөрһөлдәү, дөбөрләү, гөрһөлдәп үтеп китеү, күкрәү, яңғырау

**ПРОГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **прогры́зть**

**ПРОГРЫ́ЗТЬ** *сов. что* кимереп тишеү (тишеп сығарыу); **мышь прогры́зла дыру́** сыҫҡан кимереп тишек тишкән

**ПРОГУДЕ́ТЬ** *сов.* гөрөлдәү, гөрләү, гудок ҡысҡырыу

**ПРОГУ́Л** *м* прогул, эшкә сыҡмау (килмәү); **не допуска́ть прогу́лов** прогулға юл ҡуймау

**ПРОГУ́ЛИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **прогуля́ть** **2.** *кого*; *перен.* (*водить гулять*) йөрөтөү, йөрөтөп килтереү; **прогу́ливать ме́дленным ша́гом** аҡрын ғына йөрөтөү

**ПРОГУ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прогуля́ться** **2.** *страд. от* **прогу́ливать**

**ПРОГУ́ЛКА** *ж* прогулка, ял итеп йөрөү, саф һауала йөрөп килеү, күңел асырға сығыу; **за́городная прогу́лка** ҡала ситенә күңел асырға сығыу; **соверша́ть прогу́лку** ял итеп йөрөп килеү

**ПРОГУ́ЛЬЩИК** *м* и **ПРОГУ́ЛЬЩИЦА** *ж* прогулсы, эшкә сыҡмаусы (килмәүсе), эш ҡалдырып йөрөүсе

**ПРОГУЛЯ́ТЬ** *сов.* **1.** (*пробыть на прогулке*) саф һауала (прогулкала) йөрөү (булыу, йөрөп ҡайтыу) **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*пропустить*) йөрөп буш ҡалыу, килмәй ҡалыу, йөрөп тороп ҡалыу; **прогуля́ть обе́д** йөрөп төшкө аштан буш ҡалыу **3.** *что* и *без доп.* (*совершить прогул*) -ға/-гә сыҡмау (бармау, бармай ҡалыу, килмәй ҡалыу); **прогуля́ть заня́тия** уҡырға бармай йөрөү **4.** *что*; *прост.* (*промотать*) типтереп (аҡса) туҙҙырыу, туҙҙырып бөтөрөү

**ПРОГУЛЯ́ТЬСЯ** *сов.* (сығып) йөрөү, саф һауала (прогулкала) йөрөү (йөрөп килеү), күңел асып йөрөү; **прогуля́ться по́сле еды́** аш һеңдереп йөрөп килеү

**ПРОДАВА́ТЬ** *несов. см.* **прода́ть**

**ПРОДАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прода́ться** **2.** *страд. от* **продава́ть**

**ПРОДАВЕ́Ц** *м* и **ПРОДАВЩИ́ЦА** *ж* һатыусы; **рабо́тать продавцо́м** һатыусы булып эшләү

**ПРОДАВИ́ТЬ** *сов. что* ҡыҫып (баҫып, бөгөп, һығып) ватыу (емереү, эйеү)

**ПРОДАВИ́ТЬСЯ** *сов.* бөгөлөү, һығылыу, ватылыу, емерелеү, эйелеү

**ПРОДА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **продави́ть**

**ПРОДА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **продави́ться** **2.** *страд. от* **прода́вливать**

**ПРОДА́ЖА** *ж* **1.** *см.* **прода́ть** – **продава́ть** 1; **прода́жа иму́щества** мөлкәтте һатыу; **встре́чная прода́жа** *эк.* ҡаршы һатыу **2.** (*торговля*) һатыу, һатыу итеү, һатылыу, һатлыҡ; **назна́ченный для прода́жи** һатыуға тәғәйенләнгән; **пригото́вить для прода́жи** һатыуға әҙерләү; **быть в прода́же** һатыуҙа булыу

**ПРОДА́ЖНОСТЬ** *ж* һатылыусанлыҡ, һатылыу

**ПРОДА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һатыу …ы, һатылыу …ы; **прода́жная цена́** һатыу хаҡы **2.** (*предназначенный для продажи*) һатыла торған **3.** һатлыҡ, хаин; **прода́жная душа́** һатлыҡ йән

**ПРОДА́ЛБЛИВАТЬ** *несов. см.* **продолби́ть**

**ПРОДА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** һатып ебәреү, һатыу, атҡарыу; **прода́ть коро́ву** һыйыр һатыу; **прода́ть ве́щи** әйберҙәрҙе атҡарыу **2.** (*предать*) хыянат итеү, һатыу

**ПРОДА́ТЬСЯ** *сов. разг.* (*совершить предательство*) һатылыу, дошман яғына сығыу, хыянат итеү; **прода́ться врагу́** дошманға һатылыу

**ПРОДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **продви́нуть**

**ПРОДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **продви́нуться** **2.** *страд. от* **продвига́ть**

**ПРОДВИЖЕ́НИЕ** *с см.* **продви́нуть** – **продвига́ть**, **продви́нуться** – **продвига́ться**; **продвиже́ние по скло́ну горы́** тау итәге буйлап барыу; **продвиже́ние по слу́жбе** эш буйынса үрләү

**ПРОДВИ́НУТЬ** *сов.* **1.** *что* күсереү, этәреү, шыуҙырыу, яҡынайтыу; **продви́нуть сунду́к к две́ри** һандыҡты ишеккә табан шыуҙырыу **2.** *кого-что* (*направить куда-л.*) ебәреү, күсереү; **продви́нуть полк к передово́й ли́нии** полкты алғы һыҙыҡҡа ебәреү **3.** *что*; *перен.*, *разг.* ҡуҙғатыу, алға ебәреү, алға һөрөү; **продви́нуть де́ло** эште алға ебәреү **4.** *кого* (*выдвинуть*) күтәреү, үрләтеү; **продви́нуть по слу́жбе** хеҙмәт буйынса күтәреү

**ПРОДВИ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** (*пройти вперёд*) (алға) барыу (китеү, күсеү); **продви́нуться на не́сколько киломе́тров** бер нисә километрға алға китеү **2.** *перен.*, *разг.* алға китеү, алға барыу; **де́ло продви́нулось** эш алға китте **3.** (*выдвинуться*) күтәрелеү, үрләү; **продви́нуться по слу́жбе** хеҙмәт буйынса күтәрелеү

**ПРОДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **проде́ть**

**ПРОДЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **проде́ться** **2.** *страд. от* **продева́ть**

**ПРОДЕКЛАМИ́РОВАТЬ** *сов. что* и *без доп.* **1.** ятҡа уҡып (һөйләп) сығыу **2.** (*произнести напыщенно, с пафосом*) пафос менән һөйләү

**ПРОДЕ́ЛАТЬ** *сов.* **1.** (*сделать отверстие*) уйыу, уйып эшләү (яһап ҡуйыу); **проде́лать око́шко во двор** ихатаға ҡаратып тәҙрә уйыу **2.** (*выполнить*) үтәү, эшләп бөтөрөү, эшләп ташлау **3.** (*совершить каверзу*) мутлыҡ эшләү, хәйләләү, хитлыҡ ҡылыу, шаяртыу

**ПРОДЕ́ЛКА** *ж* **1.** *см.* **проде́лать** – **проде́лывать** **2.** (*шутливая выходка*) мутлыҡ, хәйләле эш, хитлыҡ; **соверши́ть хи́трую проде́лку** хитлыҡ ҡылыу

**ПРОДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **проде́лать**

**ПРОДЕМОНСТРИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **демонстри́ровать** 2, 3; **продемонстри́ровать еди́нство** берҙәмлек күрһәтеү; **продемонстри́ровать фильм** фильм күрһәтеү

**ПРОДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **продёрнуть**

**ПРОДЕРЖА́ТЬ** *сов. кого-что*; *в разн. знач.* тотоу, тотоп тороу; **продержа́ть окно́ откры́тым** тәҙрәне асыҡ тотоу; **продержа́ть письмо́ у себя́** хатты үҙеңдә тотоу

**ПРОДЕРЖА́ТЬСЯ** *сов.* тора алыу, түҙеп (сыҙап) тороу, тороу

**ПРОДЁРНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* (*продеть*) үткәреү, һаплау, кейҙереү **2.** *кого-что*; *перен.* (*подвергнуть критике*) эләктереү, тәнҡитләү; **продёрнуть в газе́те** гәзиттә эләктереү

**ПРОДЕ́ТЬ** *сов. что* үткәреү, һаплау, шешләү; **проде́ть ни́тку в иго́лку** энәгә еп һаплау

**ПРОДЕ́ТЬСЯ** *сов.* үткәрелеү, һапланылыу, күҙләнеү

**ПРОДЕШЕВИ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *разг.* бик арзан (осһоҙ) һатып ебәреү

**ПРОДИКТОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** әйтеп яҙҙырыу, әйтеп тороу; **продиктова́ть письмо́** әйтеп хат яҙҙырыу **2.** *перен.* үҙенекенсә эшләтеү, көсләп тағыу; **продиктова́ть свои́ усло́вия** үҙ шарттарын көсләп тағыу

**ПРОДИРА́ТЬ** *несов. см.* **продра́ть**

**ПРОДИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **продра́ться** **2.** *страд. от* **продира́ть**

**ПРОДЛЕВА́ТЬ** *несов. см.* **продли́ть**

**ПРОДЛЕ́НИЕ** *с см.* **продли́ть**; **продле́ние рабо́чего дня** эш көнөн оҙонайтыу

**ПРОДЛИ́ТЬ** *сов. что* оҙайтыу, һуҙыу, оҙонайтыу; **продли́ть о́тпуск** ялды оҙайтыу

**ПРОДЛИ́ТЬСЯ** *сов.* оҙайыу, һуҙылыу, оҙаҡҡа барыу; **боле́знь до́лго не продли́тся** сир оҙаҡҡа бармаҫ

**ПРОДНАЛО́Г** *м*; *ист.* аҙыҡ һалымы (*Рәсәйҙә нэп осоронда крәҫтиән хужалыҡтарына аҙыҡ развёрсткаһы урынына һалынған әйберләтә һалым*)

**ПРОДОВО́ЛЬСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое аҙыҡ ...ы, аҙыҡ-түлек ...ы; **продово́льственный магази́н** аҙыҡ-түлек магазины; **продово́льственный фонд** аҙыҡ фонды

**ПРОДОВО́ЛЬСТВИЕ** *с* аҙыҡ-түлек, ашамлыҡ, аҙыҡ; **доста́вка продово́льствия** аҙыҡ-түлек ташыу; **нака́пливать продово́льствие** аҙыҡ туплау

**ПРОДОЛБИ́ТЬ** *сов. что* (үтә) тишеү, соҡоп тишеү; **продолби́ть дыру́** тишек тишеү

**ПРОДОЛГОВА́ТОСТЬ** *ж* оҙонса булыу, оҙонсалыҡ

**ПРОДОЛГОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое оҙонса; **продолгова́тое лицо́** оҙонса бит

**ПРОДОЛЖА́ТЕЛЬ** *м* и **ПРОДОЛЖА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* дауам иттереүсе, дауам итеүсе

**ПРОДОЛЖА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *с неопр.* дауам итеү, дауам иттереү; **продолжа́ть рабо́тать** эшләүҙе дауам итеү **2.** *см.* **продо́лжить** 1

**ПРОДОЛЖА́ТЬСЯ** *несов.*; *в разн. знач.* һуҙылыу, дауам итеү, барыу, бара биреү; **тишина́ продолжа́лась недо́лго** тынлыҡ оҙаҡҡа һуҙылманы; **тропи́нка продолжа́ется** берләм юл һуҙыла

**ПРОДОЛЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **продо́лжить** — **продолжа́ть**, **продо́лжиться** — **продолжа́ться**; **продолже́ние разгово́ра** һөйләшеүҙе дауам итеү **2.** дауам, һуҙым; **продолже́ние рома́на** романдың дауамы ♦ **в продолже́ние** *чего*; *в знач. предлога* дауамында, буйына

**ПРОДОЛЖИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* оҙаҡ, оҙайлы, дауамлы

**ПРОДОЛЖИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** дауамлылыҡ, оҙайлылыҡ; **продолжи́тельность перегово́ров** һөйләшеүҙең оҙайлылығы **2.** (*время, срок*) ваҡыт, мәл, срок

**ПРОДОЛЖИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое оҙайлы, дауамлы, оҙон, оҙаҡ; **продолжи́тельные аплодисме́нты** оҙайлы алҡыштар; **продолжи́тельная рабо́та** дауамлы эш

**ПРОДО́ЛЖИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*продлить, увеличить*) оҙайтыу, һуҙыу, дауам иттереү; **продо́лжить о́тпуск на неде́лю** ялды бер аҙнаға оҙайтыу **2.** *см.* **продолжа́ть** 1; **продо́лжить рабо́ту** эште дауам итеү

**ПРОДО́ЛЖИТЬСЯ** *сов. см.* **продолжа́ться**

**ПРОДО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое буй, буйға һуҙылған, буйға; **продо́льный разре́з** буй киҫелеш; **продо́льная пила́** буй бысҡы; **продо́льная распи́лка** буйға ярыу

**ПРОДОХНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* (тулы итеп) тын алыу (һулау), (иркен) тын алыу, һулыш алыу; **не продохну́ть от духоты́** һауаның тынсыулығынан һулыш алырлыҡ түгел

**ПРОДРАЗВЁРСТКА** *ж*; *ист.* аҙыҡ развёрсткаһы (*1918—1921 йй. Рәсәйҙә индерелгән аҙыҡ-түлек әҙерләү системаһы*)

**ПРОДРА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* (*износить до дыр*) йыртыу, тишеп сығарыу (йыртыу); **продра́ть рукава́ на локтя́х** терһәктәрҙе тишеп сығарыу ♦ **продра́ть глаза́** *прост.* йоҡонан уяныу, күҙҙе тырнап асыу

**ПРОДРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*прорваться насквозь*) йыртылыу, тишелеү, йыртылып сығыу **2.** (*с трудом пробраться*) үтеү, уҙыу, йырып сығыу (*ҡыйынлыҡ менән*); **продра́ться сквозь кусты́** ҡыуаҡтарҙы йырып сығыу

**ПРОДРО́ГНУТЬ** *сов.* ҡалтырап (дерелдәп) өшөү, туңып бөтөү; **продро́гнуть на моро́зе** һалҡында туңып бөтөү

**ПРОДУВА́НИЕ** *с см.* **продува́ть** 1; **продува́ние самова́ра** самауырҙы өрөү

**ПРОДУВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **проду́ть**; **продува́ть самова́р** самауырҙы өрҙөрөү **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*о потоке воздуха*) ел ҡағыу, ел һуғып (иҫеп) тороу; **продува́емое ве́тром ме́сто** ел ҡаҡҡан урын

**ПРОДУ́ВКА** *ж*; *тех.* өрҙөрөү, өрҙөрөп таҙартыу; **проду́вка котла́** ҡаҙанды өрҙөрөү

**ПРОДУВНО́Й I,** -ая, -ое *разг.* хәйләкәр, алдаҡсы, мут ♦ **продувна́я бе́стия** үтә хәйләкәр

**ПРОДУВНО́Й II,** -ая, -ое *см.* **проду́вочный**; **продувно́й кла́пан** өрҙөрмәле клапан

**ПРОДУ́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* өрҙөргөс, өрҙөрмәле

**ПРОДУ́КТ** *м* **1.** (*результат человеческого труда*) емеш, һөҙөмтә; **э́та кни́га — проду́кт многоле́тних трудо́в** был китап — күп йыллыҡ хеҙмәт емеше **2.** *чего, какой* продукт; **побо́чный проду́кт** өҫтәлмә продукт; **проду́кты се́льского хозя́йства** ауыл хужалығы продукттары **3.** *обычно мн.* **проду́кты** аҙыҡ-түлек, ашамлыҡ, аҙыҡ(тар); **нака́пливать проду́кты** аҙыҡ туплау; **моло́чные проду́кты** һөт аҙыҡтары **4.** әйбер, нәмә, матдә; **проду́кты перего́нки не́фти** нефть ҡыуып алынған матдәләр

**ПРОДУКТИ́ВНОСТЬ** *ж* **1.** һөҙөмтәлелек, емешлелек, ырамлылыҡ; **продукти́вность рабо́ты** эштең һөҙөмтәлелеге **2.** *с.-х.* продуктлылыҡ, уңыш биреүсәнлек, етештереүсәнлек; **повыше́ние продукти́вности животново́дства** малсылыҡтың етештереүсәнлеген күтәреү

**ПРОДУКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*плодотворный*) продуктив, емешле, һөҙөмтәле, ырамлы; **продукти́вный труд** һөҙөмтәле хеҙмәт; **продукти́вная рабо́та** ырамлы эш **2.** *с.-х.* продуктив, аҙыҡ бирә (килтерә) торған, туҡлыҡлы; **продукти́вный скот** продукция бирә торған мал; **продукти́вные корма́** туҡлыҡлы мал аҙыҡтары **3.** *лингв.* продуктив (*яңы һүҙ яһаусы*); **продукти́вный су́ффикс** продуктив суффикс

**ПРОДУКТО́ВЫЙ,** -ая, -ое аҙыҡ-түлек ...ы, ашамлыҡ ...ы; **продукто́вый магази́н** аҙыҡ-түлек магазины

**ПРОДУКТООБМЕ́Н** *м* аҙыҡ-түлек алмашыу (алмаштырыу), продукттар алмашыу

**ПРОДУ́КЦИЯ** *ж* продукция, эшләп сығар(ыл)ған нәмә; **валова́я проду́кция** тулайым продукция; **проду́кция заво́да** завод эшләп сығарған нәмә

**ПРОДУ́МАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **проду́мать** 1; **2.** *прил.* яҡшылап (ентекләп) уйланған (уйланылған); **проду́манный отве́т** яҡшылап уйланған яуап

**ПРОДУ́МАТЬ** *сов.* **1.** *что* яҡшылап (төплө) уйлау, ентекләп (ныҡлап) уйлау; **проду́мать план рабо́ты** эш планын яҡшылап уйлау **2.** (*некоторое время*) уйлап ултырыу (тороу), уйланыу; **проду́мать всю ночь** төн буйы уйланып сығыу

**ПРОДУ́МЫВАТЬ** *несов. см.* **проду́мать** 1

**ПРОДУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* өрөү, өрҙөрөү, өрөп таҙартыу; **проду́ть самова́р** самауырҙы өрҙөрөү **2.** *кого безл.*; *разг.* (*просквозить*) үтә ел һуғыу, һыуыҡ тейеү, ел бәреү

**ПРОДУ́ШИНА** *ж* **1.** (*отверстие для воздуха*) тишек, төнлөк, елләүек **2.** (*прорубь*) мәке; (*полынья*) йылыу, шәре, ҡаран

**ПРОДЫМИ́ТЬ** *сов. что* төтәҫләү, ыҫлап бөтөрөү

**ПРОДЫМИ́ТЬСЯ** *сов.* төтөн һеңеү, төтәҫләнеү, ыҫланыу

**ПРОДЫРЯ́ВИТЬ** *сов. что*; *разг.* тишкеләү, тишкеләп бөтөрөү, тишеү; **продыря́вить мешо́к** тоҡто тишкеләү

**ПРОДЫРЯ́ВИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тишелеү, тишкеләнеп бөтөү, туҙып бөтөү; **дива́н продыря́вился** диван туҙып бөткән

**ПРОДЫРЯ́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **продыря́вить**

**ПРОДЫРЯ́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **продыря́виться 2.** *страд. от* **продыря́вливать**

**ПРОДЫША́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тәрән һулыш (тын) алыу

**ПРОЕДА́ТЬ** *несов. см.* **прое́сть**

**ПРОЕ́ЗД** *м* **1.** *см.* **проезжа́ть** I 1; **2.** (*место*) юл; **у́зкий прое́зд** тар юл **3.** (*переулок*) тыҡрыҡ

**ПРОЕ́ЗДИТЬ** *сов.* **1.** (*провести время в езде*) йөрөү, (ваҡытты) йөрөп үткәреү **2.** *что*; *разг.* (*истратить на поездку*) йөрөү өсөн тотоу, юлға тотоу, юлға тотоп бөтөрөү **3.** йөрөтөү, һыуындырыу; **прое́здить ло́шадь** атты һыуындырыу

**ПРОЕЗДНО́Й,** -ая, -ое йөрөү ...ы, юл ...ы; **проездно́й биле́т** юл йөрөү билеты

**ПРОЕ́ЗДОМ** *нареч.*; *разг.* үтеп (китеп) барышлай, юлайҡан, юл ыңғайында

**ПРОЕЗЖА́ТЬ I** *несов. см.* **прое́хать** 1, 3, 4

**ПРОЕЗЖА́ТЬ II** *несов. см.* **прое́здить** 2, 3

**ПРОЕЗЖА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **прое́хаться 2.** *страд. от* **проезжа́ть** I

**ПРОЕЗЖА́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **проезжа́ть** II

**ПРОЕ́ЗЖИЙ,** -ая, -ее **1.** (*годный для езды*) йөрөлә (йөрөй) торған, (ат, машина) менән үтерлек, йөрөрлөк; **прое́зжая доро́га** йөрөй торған юл **2.** үткенсе, үтеп барыусы, юлаусы; **прое́зжие лю́ди** үткенсе кешеләр **3.** *в знач. сущ.* **прое́зжий** *м* и **прое́зжая** *ж* юлаусы, юлсы

**ПРОЕ́КТ** *м* **1.** *в разн. знач.* проект; **прое́кт дворца́** һарай проекты; **постро́ить мост по прое́кту** күперҙе проект буйынса төҙөү; **прое́кт зако́на** закон проекты **2.** (*замысел*) уй, ниәт

**ПРОЕКТИ́РОВАНИЕ I** *с см.* **проекти́ровать** I; **проекти́рование музе́йного зда́ния** музей бинаһының проектын төҙөү

**ПРОЕКТИ́РОВАНИЕ II** *с*; *спец. см.* **проекти́ровать** II

**ПРОЕКТИ́РОВАТЬ I** *несов.* **1.** *что* (*разрабатывать проект*) проект төҙөү, проектлау, проектлаштырыу; **проекти́ровать заво́д** заводты проектлаштырыу **2.** *что* и *с неопр.* (*предполагать*) план һыҙыу, планлаштырыу; **проекти́ровать постро́йку го́рода** ҡала төҙөүҙе планлаштырыу

**ПРОЕКТИ́РОВАТЬ II** *несов. что* **1.** *мат.* проекция һыҙыу, проекциялау **2.** *см.* **проеци́ровать**

**ПРОЕКТИ́РОВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **проекти́ровать** I

**ПРОЕКТИ́РОВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **проекти́ровать** II

**ПРОЕКТИРО́ВКА** *ж см.* **проекти́ровать** I 1

**ПРОЕКТИРО́ВЩИК** *м* и **ПРОЕКТИРО́ВЩИЦА** *ж* проектсы, проектлаусы (*проект төҙөүсе*)

**ПРОЕ́КТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** проект …ы, проект(тар) төҙөү …ы; **прое́ктное бюро́** проекттар төҙөү бюроһы **2.** проект буйынса ҡаралған, проектта күрһәтелгән; **прое́ктная мо́щность** проектта күрһәтелгән ҡеүәт

**ПРОЕКЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* проекцион, проекция …ы; **проекцио́нный аппара́т** проекция аппараты; **проекцио́нный фона́рь** проекция фонары (*экранда ҙурайтып күрһәтә торған*)

**ПРОЕ́КЦИЯ** *ж* проекция (**1.** *мат. арауыҡтағы фигураларҙың яҫылыкта һүрәтләнеше* **2.** *махс. хәрәкәтһеҙ объекттарҙы экранда оптик аппарат аша төшөрөү*)

**ПРОЁМ** *м* уйым (*уйылған урын*); **о́конный проём** тәҙрә уйымы

**ПРОЕ́СТЬ** *сов. что* **1.** (*прогрызть*) киҫеү, ашау, кимереп (ашап) тишеү; **моль прое́ла сукно́** буҫтауҙы көйә киҫкән **2.** *перен.* тишеү, тишеп сығыу; **ржа́вчина прое́ла жесть** тут ҡалайҙы тишеп сыҡҡан **3.** *разг.* (*истратить на еду*) ашап бөтөрөү, ашауға тотоу

**ПРОЕ́ХАТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*проследовать по какому-л. пути*) уҙыу, үтеү (*атта, машинала, поезда һ.б.*); **прое́хать два киломе́тра** ике километр үтеү **2.** (*пробыть в пути*) барыу, юлда булыу (*күпмелер ваҡыт*) **3.** *что* (*покрыть какое-л. расстояние*) йөрөп (гиҙеп) сығыу; **прое́хать всю Сиби́рь** бөтә Себерҙе йөрөп сығыу **4.** *что* (*не остановиться, где следует*) үтеп (уҙып) китеү; **прое́хать остано́вку** туҡталышты үтеп китеү

**ПРОЕ́ХАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (бер аҙ) йөрөп ҡайтыу (килеү); **прое́хаться на ло́шади** атта йөрөп ҡайтыу ♦ **прое́хаться на счёт**; **прое́хаться по а́дресу** *см.* **пройти́сь**

**ПРОЕЦИ́РОВАТЬ** *несов. что*; *спец.* проекцияһын күрһәтеү (*һүрәтте, кинокадрҙы экранда ҙурайтып күрһәтеү*)

**ПРОЖА́РИВАТЬ** *несов. см.* **прожа́рить**

**ПРОЖА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прожа́риться 2.** *страд. от* **прожа́ривать**

**ПРОЖА́РИТЬ** *сов. что* **1.** ҡурыу, ҡыҙарғансы (ныҡ) ҡурыу; **прожа́рить мя́со** ит ҡурыу **2.** *разг.* (*сильно прогреть*) бик ныҡ ҡыҙҙырыу, утта (ҡыҙыуҙа) тотоу, ҡыҙҙырып алыу

**ПРОЖА́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о пище*) ҡурылып сығыу (етеү), ҡыҙҙырылыу; **мя́со прожа́рилось** ит ҡурылып сыҡты **2.** *перен.*, *разг.* (*сильно прогреться*) бик ныҡ йылыныу, бешеп китеү

**ПРОЖДА́ТЬ** *сов. кого-что, чего* көтөп тороу; **я прождала́ це́лый час** мин бер сәғәт буйы көтөп торҙом

**ПРОЖЕВА́ТЬ** *сов. что* (яҡшылап) сәйнәү

**ПРОЖЕВА́ТЬСЯ** *сов.* (яҡшы) сәйнәлеү

**ПРОЖЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **прожева́ть**

**ПРОЖЁВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прожева́ться 2.** *страд. от* **прожёвывать**

**ПРОЖЕКТЁР** *м*; *ирон.* прожектёр, хыялый (*тормошҡа ашмаҫлыҡ пландар төҙөүсе*)

**ПРОЖЕКТЁРСКИЙ,** -ая, -ое *ирон.* прожектёрлыҡ …ы, прожектёр(ҙар) …ы; **прожектёрский план** прожектёрҙар планы

**ПРОЖЕКТЁРСТВО** *с*; *ирон.* прожектёрлыҡ, хыялыйлыҡ

**ПРОЖЕКТЁРСТВОВАТЬ** *несов.* хыялый уй менән йәшәү, тормошҡа ашмаҫлыҡ пландар менән мауығыу

**ПРОЖЕ́КТОР** *м* прожектор (*көслө яҡтылыҡ бирә торған аппарат*)

**ПРОЖЕКТОРИ́СТ** *м* прожекторсы (*прожекторҙар менән эш итеүсе*)

**ПРОЖЕ́КТОРНЫЙ,** -ая, -ое прожектор …ы; **проже́кторный луч** прожектор нуры; **проже́кторные ла́мпы** прожектор лампалары

**ПРО́ЖЕЛТЬ** *ж* һары йүгергән төҫ, һарғылт төҫ; **зелёный с про́желтью** һарғылт йәшел төҫ

**ПРОЖЕ́ЧЬ** *сов. что* **1.** үтәнән-үтәгә көйҙөрөү, яндырып тишеү, тишкәнсе яндырыу; **проже́чь оде́жду кислото́й** кейемде кислота менән яндырып тишеү **2.** яндырып алыу, әсетеү, әсетереп алыу; **боль прожгла́ всё те́ло** ауыртыу бөтә тәнде яндырып алды **3.** *перен.* күңелде өйкәү (әрнетеү); **его́ прожгла́ мысль о разлу́ке** айырылышыу тураһындағы уй күңелен әрнетә

**ПРОЖЖЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **проже́чь 2.** *прил.*; *разг.* үтеп сыҡҡан, йышылған, йышылып бөткән, шымарған; **прожжённый плут** үтеп сыҡҡан алдаҡсы

**ПРОЖИВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **прожи́ть 2.** (*жить*) йәшәү, тороу, ғүмер итеү; **прожива́ть в го́роде** ҡалала тороу

**ПРОЖИВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **прожи́ться**

**ПРОЖИГА́ТЕЛЬ** и **ПРОЖИГА́ТЕЛЬНИЦА: прожига́тель жи́зни** аҙып-туҙып йөрөүсе, типтереп йәшәүсе

**ПРОЖИГА́ТЬ** *несов. см.* **проже́чь**

**ПРОЖИ́ЛКА** *ж* **1.** (*в камне, дереве и т.п.*) юлаҡ, һыҙат, (йоҡа) ҡатлам; **си́ние прожи́лки в бе́лом мра́море** аҡ мәрмәрҙәге күк юлаҡтар **2.** тамыр, ҡан тамыры, тарамыш; **лицо́ в прожи́лках** тамырҙары беленеп торған йөҙ

**ПРОЖИ́ТИЕ** *с* **1.** *уст. см.* **прожи́ть**; **на прожи́тие** йәшәү, тороу өсөн кәрәкле **2.** (*содержание*) йән аҫрау, ашау

**ПРОЖИ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое йәшәү …ы, тороу …ы (*йән аҫрау өсөн кәрәк булған*); **прожи́точный ми́нимум** йәшәү минимумы

**ПРОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *в разн. знач.* йәшәү, тороу, ғүмер итеү; **прожи́ть до ста лет** йөҙ йәшкә тиклем йәшәү **2.** *что* тотоноу, тотоп бөтөрөү; **прожи́ть де́ньги** аҡсаны тотоп бөтөрөү

**ПРОЖИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тотоп (тотоноп) бөтөрөү (*аҡсаны, мал-мөлкәтте*)

**ПРОЖО́РЛИВОСТЬ** *ж* ҡомағайлыҡ, мәскәйлек, туймаҫ тамаҡ булыу

**ПРОЖО́РЛИВЫЙ,** -ая, -ое ҡомағай, мәскәй, ғуж, туймаҫ тамаҡ; **прожо́рливый челове́к** ҡомағай кеше

**ПРОЖУЖЖА́ТЬ** *сов.* **1.** безелдәп осоп китеү, безелдәп үтеү; **прожужжа́ла му́ха** себен безелдәп осоп китте **2.** безелдәү, безелдәп тороу (*бер аҙ ваҡыт*) ♦ **прожужжа́ть у́ши** *см.* **у́хо**

**ПРО́ЗА** *ж* **1.** проза, сәсмә әҫәр; **писа́ть про́зой** проза менән яҙыу **2.** проза; **истори́ческая про́за** тарихи проза **3.** (*обыденность*) көндәге (ғәҙәти) тормош

**ПРОЗАИ́ЗМ** *м* прозаизм (*сәсмә әҫәргә хас һүҙ йәки һүҙбәйләнеш*); **применя́ть прозаи́змы** прозаизмдар ҡулланыу

**ПРОЗА́ИК** *м* прозаик (*проза яҙыусы*)

**ПРОЗАИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** проза ...ы; **прозаи́ческое произведе́ние** проза әҫәре **2.** (*лишённый возвышенности*) прозаға хас булған, шиғри түгел **3.** (*обыденный*) үтә ғәҙәти, ҡыҙыҡһыҙ, күңелһеҙ; **прозаи́ческая жизнь** ҡыҙыҡһыҙ тормош

**ПРОЗАИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **прозаи́ческий** 2, 3

**ПРОЗАНИМА́ТЬСЯ** *сов.* шөғөлләнеү, мәшғүл булыу; **прозанима́ться до но́чи** төнгә ҡәҙәр шөғөлләнеү

**ПРОЗВА́НИЕ** *с* исем, атама исем, ҡушамат, ләҡәп

**ПРОЗВА́ТЬ** *сов.* *кого-что* тип атау, исем тағыу, ҡушамат биреү; **прозва́ть дли́нным** һонтор тип атау

**ПРОЗВЕНЕ́ТЬ** *сов.* шылтырау, сыңғырлау, зыңғырлау

**ПРО́ЗВИЩЕ** *с* ҡушамат, ләҡәп, исем, атама исем; **дать про́звище** ҡушамат тағыу

**ПРОЗВОНИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*о звонке, телефоне*) шылтырау; (*о колоколе*) зыңлау **2.** *что* и *с неопр.* (*звоном возвестить*) шылтыратыу, шылтыратып белдереү, иғлан итеү, саң ҡағыу; **прозвони́ть переры́в** тәнәфескә шылтыратыу

**ПРОЗВУЧА́ТЬ** *сов.* **1.** (*издать звуки*) яңғырау, яңғырап китеү; **прозвуча́л вы́стрел** атыу тауышы яңғыраны **2.** (*раздаться*) ишетелеү, ишетелеп ҡалыу; **прозвуча́л го́лос** *чей-л.* *кемдеңдер* тауышы ишетелде **3.** *в чём*; *перен.* беленеү, һиҙелеү, беленеп (һиҙелеп) ҡалыу; **в его́ слова́х прозвуча́ло недово́льство** уның һүҙҙәрендә ризаһыҙлыҡ һиҙелде

**ПРОЗЕВА́ТЬ** *сов.* *кого-что*; *разг.* күрмәй ҡалыу, тороп (ауыҙ асып) ҡалыу; **прозева́ть авто́бус** автобустан тороп ҡалыу

**ПРОЗЁВЫВАТЬ** *несов.* *см.* **прозева́ть**

**ПРОЗЕ́КТОР** *м* прозектор (*хәстәханала, клиникала мәйет ярыу буйынса белгес*)

**ПРО́ЗЕЛЕНЬ** *ж* йәшкелт төҫ, йәшеллек; **не́бо голубо́е с про́зеленью** күк йәшкелт зәңгәр төҫтә ине

**ПРОЗИМОВА́ТЬ** *сов.* ҡышлау, ҡыш сығыу, ҡышты үткәреү

**ПРОЗОРЛИ́ВЕЦ** *м* и **ПРОЗОРЛИ́ВИЦА** *ж* һиҙгер (зирәк) кеше

**ПРОЗОРЛИ́ВОСТЬ** *ж* һиҙгерлек, зирәклек; **прояви́ть прозорли́вость** һиҙгерлек күрһәтеү

**ПРОЗОРЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое һиҙгер, зирәк (*алдан күреүсән кеше*)

**ПРОЗРА́ЧНОСТЬ** *ж* үтә күренеүсәнлек, сафлыҡ, асыҡлыҡ; **прозра́чность воды́** һыуҙың үтә күренеүсәнлеге

**ПРОЗРА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үтә күренеүсән, үтә күренмәле; **прозра́чное стекло́** үтә күренмәле быяла **2.** *перен.* (*простой, ясный*) ябай, аңлайышлы, аныҡ; **прозра́чный стих** ябай шиғыр **3.** *перен.* (*явный, открытый*) асыҡ, ярылып ятҡан, күренеп (һиҙелеп) торған; **прозра́чный намёк** асыҡ ишара

**ПРОЗРЕВА́ТЬ** *несов.* *см.* **прозре́ть**

**ПРОЗРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **прозре́ть**; **прозре́ние слепо́го** һуҡырҙың күҙе асылыуы **2.** (*проницательность*) үткерлек, һиҙгерлек, алдан белеү, зирәклек; **дар прозре́ния** зирәклек һәләте

**ПРОЗРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** күҙ асылыу, күреү; **прозре́ть по́сле опера́ции** операциянан һуң күҙ асылыу **2.** *перен.* аңлау, төшөнөү, күҙ асылыу; **лю́ди прозре́ли** кешеләр аңланы

**ПРОЗЫВА́ТЬ** *несов.* *см.* **прозва́ть**

**ПРОЗЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *прост.* аталыу, ҡушаматлы булыу, исеме тағылыу **2.** *страд. от* **прозыва́ть**

**ПРОЗЯБА́ТЬ** *несов.* өмөтһөҙ (күңелһеҙ) йәшәү

**ПРОЗЯ́БНУТЬ** *сов.*; *разг.* ныҡ өшөү, туңып (ҡатып) бөтөү

**ПРОИГРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* отолоу, оттороу, еңелеү; **проигра́ть матч** матчта отолоу; **проигра́ть суде́бный проце́сс** суд процесында еңелеү **2.** *что* и *без доп.* юғалтыу; **проигра́ть многое от вы́бора новой мело́дии** яңы көй һайлауҙан күп нәмә юғалтыу; **проигра́ть в разгово́ре** һөйләшеүҙә ниҙер юғалтыу **3.** *что* уйнау, уйнап алыу, уйнап күрһәтеү; **проигра́ть на кура́е** ҡурайҙа уйнап алыу **4.** уйнау, уйнап ваҡыт уҙғарыу; **проигра́ть весь день** көнө буйы уйнау

**ПРОИГРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бик ныҡ отолоу, отторол бөтөү

**ПРОИ́ГРЫВАТЬ** *несов.* *см.* **проигра́ть**

**ПРОИ́ГРЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **проигра́ться** **2.** *страд. от* **прои́грывать** 1, 3

**ПРО́ИГРЫШ** *м* **1.** оттороу, отолош; **про́игрыш в ша́хматной игре́** шахматта отолош **2.** (*проигранная сумма*) отторған аҡса, отолош **3.** (*утрата*) юғалтыу, зарар, зыян; **оста́ться в про́игрыше** зарар күреп ҡалыу

**ПРО́ИГРЫШНЫЙ,** -ая, -ое отторошло; **про́игрышное положе́ние** отторошло хәл

**ПРОИЗВЕДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **произвести́ — производи́ть 2.** әҫәр, хеҙмәт емеше; **произведе́ние иску́сства** сәнғәт әҫәре **3.** *мат.* ҡабатландыҡ

**ПРОИЗВЕСТИ́** *сов.* **1.** *что* яһау, үткәреү; **произвести́ ремо́нт** ремонт яһау; **произвести́ сле́дствие** тикшереү үткәреү **2.** *что* етештереү, эшләп сығарыу, яһау, булдырыу; **произвести́ това́р** тауар етештереү **3.** *что* (*вызвать*) сығарыу, ҡалдырыу, тыуҙырыу, яһау; **произвести́ впечатле́ние** тәьҫир ҡалдырыу; **произвести́ шум** шау-шыу сығарыу **4.** *кого* тыуҙырыу, ҡалдырыу; **произвести́ пото́мство** нәҫел ҡалдырыу **5.** (*с предлогом "в"*) дәрәжәһенә күтәреү, итеү; **произвести́ в офице́ры** офицер итеү ♦ **произвести́ на свет** тыуҙырыу, донъяға килтереү, ҡалдырыу

**ПРОИЗВОДИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** *эк.* етештереүсе, эшләп сығарыусы; **производи́тели материа́льных це́нностей** матди ҡиммәт етештереүселәр **2.** *с.-х.* (*самец*) иркәк мал, нәҫел айғыры (үгеҙе, тәкәһе һ.б.)

**ПРОИЗВОДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** етештереүсәнлек; **повыше́ние производи́тельности труда́** хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү; **производи́тельность маши́н** машинаның етештереүсәнлеге **2.** (*целесообразность*) һөҙөмтәлелек, нәтижәлелек; **производи́тельность затра́т** сығымдарҙың һөҙөмтәлелеге

**ПРОИЗВОДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое етештереүсән, һөҙөмтәле, нәтижәле; **производи́тельный труд** һөҙөмтәле хеҙмәт ♦ **производи́тельные си́лы** *эк.* етештереүсе көстәр

**ПРОИЗВОДИ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **произвести́ 2.** *что* килтереп сығарыу; **производи́ть фами́лию от сло́ва** *какого-л.* *ниндәйҙер* һүҙҙән фамилияны килтереп сығарыу

**ПРОИЗВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*образованный от другого*) сығарылма, яһалма; **произво́дное сло́во** яһалма һүҙ **2.** *в знач. сущ.* **произво́дная** *ж*; *мат.* сығарылма (дәүмәл); **произво́дная си́нуса** синус сығарылмаһы

**ПРОИЗВО́ДСТВЕННИК** *м* и **ПРОИЗВО́ДСТВЕННИЦА** *ж* производствола (сәнәғәттә) эшләүсе

**ПРОИЗВО́ДСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** етештереү ...ы, эшләп сығарыу ...ы, производство ...ы, производствола эшләү(се) ...ы; **произво́дственный проце́сс** етештереү процесы; **произво́дственное совеща́ние** производство кәңәшмәһе; **произво́дственный стаж** производствола эшләү стажы **2.** етештереүсе; **произво́дственная брига́да** етештереүсе бригада ♦ **произво́дственные отноше́ния** *эк.* етештереү мөнәсәбәттәре

**ПРОИЗВО́ДСТВО** *с* **1.** *см.* **произвести́ — производи́ть** 1, 2, 5; **произво́дство о́пытов** тәжрибәләр яһау; **произво́дство ста́ли** ҡорос етештереү **2.** *эк.* етештереү, производство; **сре́дства произво́дства** етештереү саралары; **спо́соб произво́дства** етештереү ысулы **3.** *в разн. знач.* производство; **тексти́льное произво́дство** туҡыу производствоһы; **рабо́тать на произво́дстве** производствола эшләү

**ПРОИЗВОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **производи́ть 2.** *прил.*; *эк.* етештереүсе, эшләп сығарыусы, яһаусы; **производя́щий райо́н** етештереүсе район

**ПРОИЗВО́Л** *м* **1.** (*собственное желание*) теләк, мәйел **2.** (*своеволие*) башбаштаҡлыҡ, законһыҙлыҡ; **произво́л чино́вников** чиновниктың башбаштаҡлығы **3.** (*необоснованность*) дәлилһеҙлек, нигеҙһеҙлек; **произво́л в сужде́ниях** фекер йөрөтөүҙәге нигеҙһеҙлек ♦ **оста́вить (бро́сить, поки́нуть и т.п.) на произво́л судьбы́** яҙмыш ҡосағына (ҡулына) ташлау, ярҙамһыҙ ҡалдырыу

**ПРОИЗВО́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** иреклелек, буйһонмау; **произво́льность движе́ний** хәрәкәттәрҙең иреклелеге **2.** нигеҙһеҙлек; **произво́льность вы́вода** һығымтаның нигеҙһеҙлеге

**ПРОИЗВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*свободный*) ирекле, бәйһеҙ; **произво́льные движе́ния** ирекле хәрәкәттәр **2.** (*лишённый доказательств*) дәлилһеҙ, нигеҙһеҙ; **произво́льное толкова́ние** дәлилһеҙ аңлатма **3.** (*самовольное*) башбаштаҡ; **произво́льное распоряже́ние** башбаштаҡ әмер

**ПРОИЗНЕСТИ́** *сов. что* **1.** (*сказать, выговорить*) әйтеү, һөйләү; **пра́вильно произнести́ сло́во** һүҙҙе дөрөҫ әйтеү **2.** (*огласить*) иғлан итеү; **произнести́ пригово́р** хөкөм ҡарарын иғлан итеү

**ПРОИЗНОСИ́ТЬ** *несов. см.* **произнести́**

**ПРОИЗНОСИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **произноси́ть**

**ПРОИЗНОШЕ́НИЕ** *с* **1.** әйтелеш; **произноше́ние носовы́х зву́ков** танау өндәренең әйтелеше **2.** өндәр системаһы; **ру́сское произноше́ние** урыҫ теленең өндәр системаһы

**ПРОИЗОЙТИ́** *сов.* **1.** булыу, (килеп) сығыу; **ме́жду на́ми произошёл спор** беҙҙең арала бәхәс булды; **произошёл пожа́р** янғын сыҡты **2.** *от кого-чего* тыуыу, барлыҡҡа килеү; **челове́к произошёл от обезья́ны** кеше маймылдан барлыҡҡа килгән

**ПРОИЗРАСТА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **произрасти́ 2.** (*расти где-л. — о растениях*) үҫеп китеү, таралыу

**ПРОИЗРАСТИ́** *сов.* (*вырасти*) үҫеү, (үҫеп) сығыу; **дере́вья произросли́** ағастар үҫкән

**ПРОИЛЛЮСТРИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **иллюстри́ровать**

**ПРОИНФОРМИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **информи́ровать**; **проинформи́ровать люде́й** кешеләргә хәбәр итеү

**ПРОИСКА́ТЬ** *сов. кого-что* эҙләп ваҡыт үткәреү, эҙләү (*бер ни тиклем ваҡыт*)

**ПРО́ИСКИ** *только мн.* аҫтыртын эҙләнеүҙәр, мәкерле соҡсоноуҙар, интригалар; **про́иски враго́в** дошмандарҙың мәкерле соҡсоноуҙары

**ПРОИСТЕКА́ТЬ** *несов. см.* **происте́чь**

**ПРОИСТЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *книжн., уст.* ағыу, ағылыу, ағып (килеп) сығыу **2.** *перен.* тыуыу, барлыҡҡа килеү, килеп сығыу; **оши́бка проистекла́ от невнима́тельности** хата иғтибарһыҙлыҡтан килеп сыҡты

**ПРОИСХОДИ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **произойти́ 2.** *от кого-чего, из кого-чего* сығыу, килеп сығыу; **он происхо́дит из крестья́н** ул крәҫтиән ғаиләһенән сыҡҡан

**ПРОИСХОЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** сығыш; **он башки́р по происхожде́нию** ул сығышы менән башҡорт **2.** (*возникновение*) килеп сығыу, барлыҡҡа килеү; **происхожде́ние языка́** телдең барлыҡҡа килеүе

**ПРОИСШЕ́СТВИЕ** *с* хәл-ваҡиға, мажара, хәл; **доро́жное происше́ствие** юлда булған хәл; **очеви́дец происше́ствия** хәл-ваҡиғаның шаһиты

**ПРОЙДО́ХА** *м* и *ж*; *разг.* әрһеҙ, йышылған, хәйләкәр

**ПРО́ЙМА** *ж* eң төбө

**ПРОЙТИ́** *сов.* **1.** *что* и *без доп.*; *в разн. знач.* үтеү, уҙыу, барыу, үтеп (уҙып) китеү; **де́ти прошли́** балалар уҙып китте; **пройти́ по мосту́** күперҙән үтеү; **прошёл год** бер йыл үтеп китте; **пройти́ пять киломе́тров** биш километр үтеү; **пройти́ лес** урман аша уҙыу; **пройти́ к роднику́** шишмәгә барыу; **по́езд прошёл** поезд үтеп китте **2.** (*выпасть — об осадках*) булыу, булып үтеү, яуып үтеү; **прошёл си́льный дождь** көслө ямғыр булып үтте **3.** *без доп.* (*распространиться — о слухах, вестях*) таралыу, ишетелеү; **прошёл слух** хәбәр таралды **4.** (*просочиться*) үтеү, үтеп сығыу; **черни́ла прошли́ сквозь бума́гу** ҡара ҡағыҙ аша үтеп сыҡҡан **5.** *что, через что* кисереү, үтеү; **пройти́ че́рез испыта́ния** һынауҙар аша үтеү **6.** *что* үтеү, үткәреү; **пройти́ вое́нную слу́жбу** хәрби хеҙмәтте үтеү; **пройти́ пра́ктику** практика үтеү **7.** *что*; *разг.* үтеү, тамамлау; **пройти́ буква́рь** әлифбаны үтеү **8.** (*прекратиться*) туҡтау, үтеү; **мете́ль прошла́** буран үтте **9.** *разг.* (*перестать болеть*) туҡтау, бөтөү; **голова́ прошла́** баш ауыртыуы бөттө **10.** *что, по чему*; *спец., разг.* буяу, ағартыу, эшкәртеү, эшкәртеп үтеү; **пройти́ потоло́к ме́лом** түшәмде аҡбур менән ағартыу **11.** тикшерелеп үтеү, аша үтеү, -нан/-нән үтеү; **пройти́ че́рез цензу́ру** цензуранан үтеү ♦ **пройти́ в жизнь** тормошҡа ашыу; **пройти́ ми́мо** иғтибарһыҙ ҡалдырыу; **пройти́ ого́нь и во́ду (и ме́дные тру́бы)** *см.* **ого́нь**; **да́ром не пройдёт** *см.* **да́ром**; **э́то не пройдёт (не прошло́)** был барып сыҡмаҫ, был нәмә килеп сыҡмаҫ

**ПРОЙТИ́СЬ** *сов.* **1.** урап (йөрөп) килеү, йөрөп әйләнеү (ҡайтыу); **пройти́сь по па́рку** парк буйлап йөрөп килеү **2.** *разг.* бейеп алыу; **пройти́сь в ва́льсе** вальс бейеп алыу **3.** *по чему*; *разг.* таҙартыу, һыпырыу; **пройти́сь щёткой по ковру́** келәмде щётка менән таҙартыу ♦ **пройти́сь на счёт** *чей кемгәлер* төрттөрөп әйтеү

**ПРОК** *м*; *разг.* файҙа, рәт; **про́ку нет** файҙа юҡ

**ПРОКАЖЁННЫЙ** *м* и **ПРОКАЖЁННАЯ** *ж* проказалы, махау ауырыулы

**ПРОКА́ЗА I** *ж* шаянлыҡ, шуҡлыҡ; **прока́зы кло́унов** клоундарҙың шуҡлыҡтары

**ПРОКА́ЗА II** *ж* проказа, махау ауырыуы

**ПРОКА́ЗНИК** *м* и **ПРОКА́ЗНИЦА** *ж* шаян, шуҡ, тиктормаҫ (кеше)

**ПРОКА́ЗНИЧАТЬ** *несов.* шаярыу, шуҡлыҡ күрһәтеү

**ПРОКА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **прокали́ть**

**ПРОКА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прокали́ться 2.** *страд. от* **прока́ливать**

**ПРОКАЛИ́ТЬ** *сов. что* (*подвергнуть калению*) бик ныҡ ҡыҙҙырыу, бик ныҡ эҫетеү, яндырыу, сыныҡтырыу; **прокали́ть про́волоку** сымды бик ныҡ ҡыҙҙырыу

**ПРОКАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* бик ныҡ ҡыҙыу, сынығыу

**ПРОКА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **проколо́ть**

**ПРОКА́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **проколо́ться 2.** *страд. от* **прока́лывать**

**ПРОКАНИТЕ́ЛИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оҙаҡ маташыу (аҙапланыу), маташып ваҡыт үткәреү, кәрәгенән артыҡ булышыу

**ПРОКА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **прокопа́ть**

**ПРОКА́ПЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прокопа́ться** 1; **2.** *страд. от* **прока́пывать**

**ПРОКАРАУ́ЛИТЬ** *сов. кого-что* и *без доп.*; *разг.* **1.** (*прозевать, карауля*) ҡулдан ысҡындырыу, ҡарауыллап та тота алмау **2.** һаҡлап (һағалап) тороу, ҡарауыллау, һағалау; **прокарау́лить всю ночь** төнө буйы ҡарауыллау

**ПРОКА́РМЛИВАТЬ** *несов. см.* **прокорми́ть** 1

**ПРОКА́РМЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прокорми́ться 2.** *страд. от* **прока́рмливать**

**ПРОКА́Т I** *м*; *тех.* **1.** *см.* **прока́тка 2.** *собир.* прокат (*прокатланған нәмәләр*); **вы́пуск прока́та** прокат эшләп сығарыу

**ПРОКА́Т II** *м* прокат, ҡуртым; **пла́та за прока́т** ҡуртым өсөн түләү

**ПРОКАТА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*разгладить*) тәгәр(л)әтеп тигеҙләү (*шымартыу*); **проката́ть бельё** керҙе тәгәрләтеп тигеҙләү **2.** *что*; *тех.* прокатлау; **проката́ть сталь** ҡорос прокатлау **3.** *кого-что* (ултыртып) йөрөтөү, йөрөтөп килтереү; **два часа́ проката́ть дете́й на ло́дке** балаларҙы ике сәғәт кәмәлә йөрөтөү

**ПРОКАТА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (тәгәр(л)әтеп) тигеҙләнеү, шымар(тыл)ыу; **бельё проката́лось** кер шымарҙы **2.** (ултырып) йөрөү, йөрөп килеү; **проката́ться це́лый день на велосипе́де** көн буйы велосипедта йөрөү

**ПРОКАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* йөрөтөп килтереү, йөрөтөп алыу; **прокати́ть на автомоби́ле** автомобилдә йөрөтөп алыу **2.** *что* тәгәрәтеү, тәгәр(л)әтеп алып китеү; **прокати́ть бо́чку** мискәне тәгәрәтеп алып китеү **3.** *кого*; *перен., разг.* (*не*

*избрать куда-л.*) һайламау, төшөрөп ҡалдырыу **4.** *без доп.*; *разг.* елеп үтеү, елдереп үтеп китеү; **прокати́ть ми́мо до́ма** өй эргәһенән елеп үтеү ♦ **прокати́ть на вороны́х** һайлауҙа үткәрмәү, төшөрөп ҡалдырыу

**ПРОКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тәгәр(л)әү, тәгәр(л)әп китеү; **мяч прокати́лся** туп тәгәрәп китте **2.** ултырып йөрөп килеү; **прокати́ться на маши́не** машинала йөрөп килеү **3.** *перен.* яңғырау, ишетелеү; **гро́хот вы́стрела прокати́лся по селу́** атыу тауышы ауылғаса яңғыраны **4.** *перен.* таралыу, таралып китеү; **сла́ва о геро́е прокати́лась по земле́** ҡаһармандың даны ил буйлап таралды

**ПРОКА́ТКА** *ж*; *тех.* прокатлау; **прока́тка труб** торбаларҙы прокатлау

**ПРОКА́ТНЫЙ I,** -ая, -ое *тех.* **1.** прокат ...ы, прокатлау ...ы; **прока́тный стан** прокатлау станы **2.** прокатлау ...ы; **прока́тный цех** прокатлау цехы

**ПРОКА́ТНЫЙ II,** -ая, -ое **1.** прокатҡа бирә торған (биреп тороусы), ҡуртым ...ы, прокат ...ы; **прока́тный пункт** прокат пункты **2.** прокатҡа (ҡуртымға) бирелә торған (бирелгән); **прока́тный телеви́зор** прокатҡа бирелә торған телевизор

**ПРОКА́ТЧИК** *м* прокатсы (*прокат цехы эшсеһе*)

**ПРОКА́ТЫВАТЬ I** *несов. см.* **проката́ть** 1, 2

**ПРОКА́ТЫВАТЬ II** *несов. см.* **прокати́ть**

**ПРОКА́ТЫВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **проката́ться** 1; **2.** *страд. от* **прока́тывать** I

**ПРОКА́ТЫВАТЬСЯ II** *несов. см.* **прокати́ться**

**ПРОКА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **прокоси́ть** 1, 2

**ПРОКА́ШЛИВАТЬ** *несов. см.* **прока́шлять** 1, **прока́шлянуть**

**ПРОКА́ШЛИВАТЬСЯ** *несов. см.* **прока́шляться**

**ПРОКА́ШЛЯНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** йүткереү, йүтәлләп алыу, йүткереп алыу **2.** *что* (*кашлянув, очистить горло*) йүткереп тамаҡ таҙартыу, йүткереп ҡаҡырыҡ сығарыу

**ПРОКА́ШЛЯТЬ** *сов.* **1.** *что*; *разг. см.* **прока́шлянуть** 2; **2.** йүткереп (йүтәлләп) сығыу, йүтәлләү, оҙаҡ йүткереү; **прока́шлять всю ночь** төнө буйы йүткереү

**ПРОКА́ШЛЯТЬСЯ** *сов.* йүткереп тамаҡ таҙартыу, йүткереп ҡаҡырыҡ сығарыу

**ПРОКИПА́ТЬ** *несов. см.* **прокипе́ть** 1

**ПРОКИПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ҡайнау, ҡайнап сығыу (етеү), ныҡлап ҡайнау; **суп прокипе́л** аш ҡайнап сыҡты **2.** ҡайнап тороу, ҡайнау (*күпмелер*)

**ПРОКИПЯТИ́ТЬ** *сов. что* ҡайнатыу, ҡайнатып сығарыу (алыу); **прокипяти́ть во́ду** һыуҙы ҡайнатып сығарыу; **прокипяти́ть шприц** шприцты ҡайнатыу

**ПРОКИСА́ТЬ** *несов. см.* **проки́снуть**

**ПРОКИ́СНУТЬ** *сов.* әсеү, әсеп сығыу; **молоко́ проки́сло** һөт әсегән

**ПРОКЛА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **прокла́дывать 2.** ҡатлау, тығыҙлыҡ ҡатлауы, прокладка; **рези́новая прокла́дка** резина ҡатлау

**ПРОКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **проложи́ть**

**ПРОКЛАМАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое прокламацион, прокламация ...ы; **прокламацио́нный листо́к** прокламация листогы

**ПРОКЛАМА́ЦИЯ** *ж* прокламация; **распространя́ть проклама́ции** прокламациялар таратыу

**ПРОКЛЕВА́ТЬ** *сов. что* суҡып тишеү; (*о птенце*) моронлау; **цыплёнок проклева́л скорлупу́** себеш моронлаған

**ПРОКЛЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **проклева́ть**, **проклю́нуть**

**ПРОКЛЁВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **проклю́нуться 2.** *страд. от.* **проклёвывать**

**ПРОКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **прокле́ить**

**ПРОКЛЕ́ИТЬ** *сов. что* келәйләү, йәбештереү, елемләү, елем һөртөү, елем менән йәбештереү; **прокле́ить карто́н** ҡатырғаны елемләү

**ПРОКЛЕ́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **прокле́ить** — **прокле́ивать**; **прокле́йка бума́ги** ҡағыҙҙы елемләү **2.** (*клейкое вещество*) елем, келәй **3.** (*то, что проклеено*) елемләнгән нәмә

**ПРОКЛИНА́ТЬ** *несов. см.* **прокля́сть**

**ПРОКЛЮ́НУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*о птенцах*) моронлау; **утя́та проклю́нулись** өйрәк себештәре моронлаған **2.** (*прорасти*) шытып сығыу, моронлау, үҫенте ебәреү

**ПРОКЛЯ́СТЬ** *сов. кого-что* ҡарғау, ҡәһәрләү, ләғнәт уҡыу ♦ **будь (три́жды) про́клят!** ләғнәт төшкөрө (төшһөн)!, ҡәһәр һуҡҡыры (һуҡһын)!

**ПРОКЛЯ́ТИЕ** *с* **1.** ҡәһәр, ҡарғыш, ләғнәт **2.** (*ругательство*) һүгенеү, әрләү, тиргәү; **сы́пать прокля́тия** әрләү яуҙырыу **3.** *в знач. межд.* ҡәһәр һуҡҡыры, ләғнәт төшкөрө

**ПРОКЛЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое ҡарғалған, ҡарғыш алған, ҡәһәр һуҡҡан, ләғнәт төшкән, бәдбәхет ♦ **прокля́тый вопро́с** ауыр (хәл итмәҫлек) хәл

**ПРОКОВЫЛЯ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ауа-түнә барыу (барып етеү), аҡһай-туҡһай атлау, туңҡанлау, көскә һөйрәлеп барыу

**ПРОКОВЫ́РИВАТЬ** *несов. см.* **проковыря́ть**

**ПРОКОВЫРЯ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* соҡоп тишеү, соҡой-соҡой тишеп сығарыу; **проковыря́ть до́ску** таҡтаны соҡоп тишеү

**ПРОКО́Л** *м* **1.** *см.* **проколо́ть** — **прока́лывать**; **проко́л ши́ны** шинаны тишеү; **проко́л колеса́** тәгәрмәсте тишеү **2.** (*отверстие*) тишек **3.** *перен., разг.* (*недочёт*) уңышһыҙлыҡ

**ПРОКОЛО́ТЬ** *сов. что* **1.** тишеү, сәнсеп (төртөп) тишеү, тишеп сығарыу; **проколо́ть у́ши** ҡолаҡ тишеү **2.** (*ранить чем-л. колющим*) сәнсеү, ҡаҙау; **проколо́ть штыко́м** штык менән сәнсеү

**ПРОКОЛО́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тишелеү, ҡаҙалып (сәнселеп) тишелеү; **ка́мера проколо́лась** камера тишелгән

**ПРОКОММЕНТИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **комменти́ровать**

**ПРОКОМПОСТИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **компости́ровать**; **прокомпости́ровать биле́т** билет компостерлау

**ПРОКОНОПА́ТИТЬ** *сов. что* һыҙлыҡлап сығыу (бөтөрөү)

**ПРОКОНОПА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **проконопа́тить**

**ПРОКОНСПЕКТИ́РОВАТЬ** *сов. что* конспектлау, конспект төҙөп сығыу, конспектын төҙөү; **проконспекти́ровать кни́гу** китапты конспектлау

**ПРОКОНСУЛЬТИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **консульти́ровать**

**ПРОКОНТРОЛИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **контроли́ровать**

**ПРОКОПА́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡаҙыу, ҡаҙып ташлау; **прокопа́ть кана́ву** канау ҡаҙып ташлау **2.** (*копая, пройти насквозь*) ҡаҙып (соҡоп, ярып) сығыу, үтәләй ҡаҙыу; **прокопа́ть курга́н** ҡурғанды ҡаҙып сығыу

**ПРОКОПА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** ҡаҙып барып төшөү; **прокопа́ться до воды́** һыу сыҡҡансы ҡаҙып барып төшөү **2.** (*копаться в течение какого-л. времени*) ҡаҙынып (соҡоноп) ваҡыт үткәреү, соҡоноп (ҡаҙынып) йөрөү

**ПРОКОПТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*пропитать копотью, дымом*) ыҫлап (ҡоромлап) бөтөү, ыҫ (төтөн) һеңдереү; **прокопти́ть ко́мнату** бүлмәне ыҫлап бөтөү **2.** *что* ыҫлау, ҡаҡлау, ыҫлап (ҡаҡлап) әҙерләү; **прокопти́ть ры́бу** балыҡ ыҫлау **3.** *без доп.* төтәү, һөрөм сығарыу (*бер ни тиклем ваҡыт*)

**ПРОКОПТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*покрыться копотью*) һөрөмләнеү, ҡоромланыу, һөрөм (ҡором) ултырыу (һеңеү); **сте́ны прокопти́лись** стеналарға һөрөм һеңгән **2.** ыҫланыу, ҡаҡланыу, ыҫланып (ҡаҡланып) етеү; **ры́ба прокопти́лась** балыҡ ыҫланған

**ПРОКОРМИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ашатыу, туйҙырыу, ашатып (туйҙырып) аҫрау (ҡарау); **прокорми́ть семью́** ғаиләне туйҙырыу **2.** ашатыу, ашатып тороу (*күпмелер ваҡыт*)

**ПРОКОРМИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйыныу, туйынып тороу, йән (тамаҡ) аҫрау

**ПРОКО́С** *м* **1.** *см.* **прокоси́ть – прока́шивать** 1, 2; **2.** (*прокошенная полоса*) ҡайырым; **ширина́ проко́са** салғы ҡайырымы

**ПРОКОСИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* сабып билге яһау, ыҙан һалыу; **прокоси́ть по́лосу** сабып буй ыҙан һалыу **2.** *что* (*выкосить*) сабып алыу (сығыу); **прокоси́ть бурья́н** ҡарағураны сабып сығыу **3.** *что* и *без доп.* сабыу, сабып үткәреү (*бер аҙ ваҡыт*); **прокоси́ть це́лую неде́лю** аҙна буйы сабыу

**ПРОКРА́СИТЬ** *сов. что* буяу, буяп сығыу (ҡуйыу); **прокра́сить ра́мы** ҡыҫандарҙы буяп ҡуйыу

**ПРОКРА́СИТЬСЯ** *сов.* буялыу, буяу һеңеү (инеү); **ткань прокра́силась** туҡымаға буяу һеңгән

**ПРОКРА́СТЬСЯ** *сов.* боҫоп ҡына (шым ғына) үтеп инеү, һиҙҙермәй генә үтеү

**ПРОКРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **прокра́сить**

**ПРОКРИЧА́ТЬ** *сов.* **1.** аҡырыу, ҡысҡырыу, ҡысҡырып (аҡырып) ебәреү; **пету́х прокрича́л** әтәс ҡысҡырҙы; **прокрича́ть "ура́"** "ура" ҡысҡырыу **2.** *что* и *без доп.* ҡысҡырыу, ҡысҡырып тороу (*күпмелер ваҡыт*); **прокрича́ть весь ве́чер** кис буйына ҡысҡырып тороу ♦ **прокрича́ть у́ши** *см.* **у́хо**

**ПРОКРУТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** әйләндереү, әйләндереп сығарыу; **прокрути́ть вал мото́ра** моторҙың валын әйләндереү **2.** *прост.* әйләндереү, әйләндереп ҡарау (*фильм, плёнка һ.б.*)

**ПРОКРУТИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **прокру́чиваться** 1

**ПРОКРУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **прокрути́ть**

**ПРОКРУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *тех.* бушҡа әйләнеү, әйләнеп сығыу; **колесо́ прокру́чивается** тәгәрмәс бушҡа әйләнә **2.** *страд. от* **прокру́чивать**

**ПРОКУЛЬТИВИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **культиви́ровать** 1

**ПРОКУРАТУ́РА** *ж* прокуратура; **прокурату́ра райо́на** район прокуратураһы

**ПРОКУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **прокури́ть**

**ПРОКУРИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* тәмәке еҫе һеңдереү, тәмәке төтөнө менән тултырыу; **прокури́ть ко́мнату** бүлмәне тәмәке төтөнө менән тултырыу **2.** *что* тәмәкегә (тартыуға) тотоу (тотоноу), тәмәкегә (тартыуға) тотоноп бөтөү; **прокури́ть сто рубле́й** йөҙ һумды тәмәкегә тотоноу **3.** *что* и *без доп.* тәмәке тартыу, тәмәке тартып тороу (*күпмелер ваҡыт*), тәмәке тартып ваҡыт үткәреү

**ПРОКУРО́Р** *м* прокурор; **прокуро́р го́рода** ҡала прокуроры

**ПРОКУРО́РСКИЙ,** -ая, -ое прокурор ...ы; **прокуро́рский надзо́р** прокурор күҙәтеүе

**ПРОКУ́С** *м* тешләнгән урын (эҙ)

**ПРОКУСИ́ТЬ** *сов. что* үтә тешләү, тешләп тишеү, тешләп өҙөү (сығарыу, яралау)

**ПРОКУ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **прокуси́ть**

**ПРОКУТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*истратить на кутежи*) типтереп әрәм-шәрәм итеү, кәйеф-сафа ҡороуға туҙҙырыу (*аҡсаны, байлыҡты*) **2.** *без доп.* (*провести какое-л. время в кутеже*) типтереү, типтереп алыу (йөрөү, уҙғарыу)

**ПРОКУТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* кәйеф-сафа ҡороуға бөтөрөү, типтереп йөрөп бөлөү (*аҡсаны*)

**ПРОКУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **прокути́ть** 1

**ПРОЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **проложи́ть** 1

**ПРОЛА́З** *м*; *разг.* үтеп йөрөмәле тишек, үткел

**ПРОЛА́ЗА** *м* и *ж*; *разг.* йышылған, мут, йылмаяҡ, үтә хәйләкәр кеше

**ПРОЛА́МЫВАТЬ** *несов. см.* **пролома́ть, проломи́ть**

**ПРОЛА́МЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **проломи́ться 2.** *страд. от* **прола́мывать**

**ПРОЛА́ЯТЬ** *сов.* өрөү, өрөп алыу, өрөп сығыу; **соба́ка прола́яла всю ночь** эт төнө буйы өрөп сыҡты

**ПРОЛЕГА́ТЬ** *несов. см.* **проле́чь**

**ПРОЛЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** ятыу, ятып тороу (сығыу, үткәреү) (*билдәле бер ваҡыт*); **пролежа́ть всю ночь** төнө буйы ятыу; **письмо́ пролежа́ло на по́чте** хат почтала ятҡан **2.** *что*; *разг.* (*отлежать*) уңайһыҙ (ипһеҙ) ятып ойотоу (иҫһеҙләндереү); **пролежа́ть бок** ипһеҙ ятып ҡабырғаны иҫһеҙләндереү

**ПРО́ЛЕЖЕНЬ** *м* оҙаҡ ятыуҙан тән боҙолоу (тишелеү)

**ПРОЛЁЖИВАТЬ** *несов. см.* **пролежа́ть**

**ПРОЛЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **проле́зть**

**ПРОЛЕ́ЗТЬ** *сов.* **1.** (ҡыҫылып) үтеү, инеү, үтеп инеү; **проле́зть че́рез окно́** тәҙрә аша үтеп инеү **2.** *перен.*, *разг.* тырышып (хәйлә менән) үтеп инеү

**ПРОЛЁТ I** *м см.* **пролете́ть** – **пролета́ть** I 1; **пролёт птиц** ҡоштарҙың осоп үтеүе

**ПРОЛЁТ II** *м* **1.** аралыҡ, асыҡ урын; **пролёт воро́т** ҡапҡа аралығы **2.** (*моста*) тороҡ; **мост с шестью́ пролётами** алты тороҡло күпер **3.** аралыҡ (*колонналарҙа, баҫҡыста һ.б.*); **упа́сть в пролёт ле́стницы** баҫҡыс аралығына йығылыу **4.** *разг.* (*перегон*) ара

**ПРОЛЕТАРИА́Т** *м* пролетариат; **борьба́ пролетариа́та за свои́ права́** пролетариаттың үҙ хоҡуҡтары өсөн көрәше

**ПРОЛЕТАРИЗА́ЦИЯ** *ж* пролетарлашыу

**ПРОЛЕТАРИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* пролетарлаштырыу

**ПРОЛЕТАРИЗИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* пролетарлашыу **2.** *несов. страд. от* **пролетаризи́ровать**

**ПРОЛЕТА́РИЙ** *м* пролетарий; **объедине́ние пролета́риев** пролетарийҙарҙың берләшеүе

**ПРОЛЕТА́РСКИЙ,** -ая, -ое пролетар, пролетариат ...ы; **пролета́рская револю́ция** пролетар революция

**ПРОЛЕТА́ТЬ I** *несов. см.* **пролете́ть**

**ПРОЛЕТА́ТЬ II** *сов.* осоу, осоп йөрөү, осоп ваҡыт үткәреү; **пролета́ть на самолёте час** самолётта бер сәғәт осоу

**ПРОЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** осоу, осоп үтеү, осоп үтеп китеү; **пролете́ть ты́сячу киломе́тров** мең километр осоп үтеү **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*промчаться*) елеп (шәп итеп, выжлап) үтеп китеү, бик тиҙ осоп үтеү; **пролете́л курье́рский по́езд** курьер поезы елеп үтте **3.** (*о времени*) бик тиҙ үтеү, үтеп китеү; **день пролете́л** көн бик тиҙ үтте **4.** *без доп.*; *перен.* (*о мыслях*) сағылып ҡалыу (китеү, уҙыу)

**ПРОЛЁТКА** *ж* еңел кырандас

**ПРОЛЕ́ЧЬ** *сов.* үтеү, уҙыу, ятыу, һуҙылыу (*юл, һуҡмаҡ һ.б. тураһында*)

**ПРОЛИ́В** *м* боғаҙ; **у́зкий проли́в** тар боғаҙ

**ПРОЛИВА́ТЬ** *несов. см.* **проли́ть** 1

**ПРОЛИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **проли́ться 2.** *страд. от* **пролива́ть**

**ПРОЛИВНО́Й,** -ая, -ое ҡойма, ҡойоп яуған, бик көслө; **проливно́й дождь** ҡойма ямғыр

**ПРОЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* түгеү, түгеп ебәреү; **проли́ть чай** сәйҙе түгеп ебәреү **2.** *разг.* (*о дожде*) ҡойоу, ҡойоп яуыу, яуып үтеү ♦ **проли́ть кровь** *чью* ҡанын ҡойоу; **проли́ть свою́ кровь** *за кого-что* ҡан ҡойоу, үлеү, яраланыу; **проли́ть свет** *см.* **свет I**; **проли́ть слезу́** *см.* **слеза́**

**ПРОЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** түгелеү, түгелеп китеү (бөтөү); **вода́ пролила́сь из ведра́** күнәктән һыу түгелде **2.** ҡойоу, ҡойоп яуыу, яуып үтеү; **проли́лся дождь** ямғыр яуып үтте ♦ **пролила́сь кровь** ҡан ҡойолдо (түгелде)

**ПРОЛО́Г** *м* пролог (*әҙәби һәм музыкаль әҫәрҙең инеш бүлеге*)

**ПРОЛОЖИ́ТЬ** *сов. что* **1.** һалыу, үткәреү, һуҙыу; **проложи́ть доро́гу** юл һалыу; **проложи́ть кана́л** канал үткәреү **2.** (*нанести на карту*) һыҙыу, картаға төшөрөү; **проложи́ть курс** курс һыҙыу **3.** (*переложить*) араға (уртаға) һалып ҡалдырыу (ҡыҫтырыу), аралаштырып һалыу; **проложи́ть посу́ду соло́мой** һауыт-һабаны һалам менән аралаштырып һалыу ♦ **проложи́ть доро́гу (путь)** *кому-чему* юл асыу (һалыу)

**ПРОЛО́М** *м* **1.** *см.* **проломи́ть** – **прола́мывать**, **проломи́ться** – **прола́мываться 2.** (*место*) тишек, емерек, һыныҡ урын, емерек ер; **проло́м в стене́** стеналағы тишек

**ПРОЛОМА́ТЬ** *сов. что* (*в несколько приёмов*) тишеү, тишеп сығарыу, емереү; **пролома́ть сте́ну** стенаны емереү

**ПРОЛОМА́ТЬСЯ** *сов.*; *прост. см.* **проломи́ться**

**ПРОЛОМИ́ТЬ** *сов. что* тишеү, ватыу, емереү, ватып (емереп) тишеү, уйыу, тишеп сығарыу; **проломи́ть лёд** боҙҙо ватыу; **проломи́ть мост** күперҙе емереп төшөрөү

**ПРОЛОМИ́ТЬСЯ** *сов.* ватылыу, емерелеү, һыныу, ватылып (емерелеп, уйылып) сығыу (төшөү), ярылыу

**ПРОЛОНГА́ЦИЯ** *ж*; *спец.* пролонгация, кисектереү, оҙайтыу; **пролонга́ция сро́ка аре́нды** ҡуртым ваҡытын оҙайтыу

**ПРОЛОНГИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *спец.* ваҡытын оҙайтыу, кисектереү; **пролонги́ровать догово́р** килешеү ваҡытын оҙайтыу

**ПРОМА́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* майлау, майлап сығыу; **прома́зать колесо́ маши́ны** машинаның тәгәрмәстәрен майлап сығыу **2.** *что* (*замазать*) һылау, һылап ҡуйыу (сығыу); **прома́зать все**

**ще́ли** бөтә ярыҡтарҙы һылап ҡуйыу **3.** *прост.* (*промахнуться*) яҙа атыу (бәреү, һуғыу һ.б.)

**ПРОМА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **прома́зать**

**ПРОМА́СЛИВАТЬ** *несов. см.* **прома́слить**

**ПРОМА́СЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прома́слиться 2.** *страд. от* **прома́сливать**

**ПРОМА́СЛИТЬ** *сов. что* майлау, май һеңдереү; **прома́слить ко́жу** тирегә май һеңдереү

**ПРОМА́СЛИТЬСЯ** *сов.* май һеңеү, майланыу

**ПРОМА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **промота́ть**

**ПРОМА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **промота́ться 2.** *страд. от* **прома́тывать**

**ПРО́МАХ** *м* **1.** тейҙермәү; **стреля́ть без про́маха** тейҙермәй атыу **2.** *перен.* (*ошибка*) хата, яңылышлыҡ, яңылышлыҡ (хаталыҡ) эшләү; **про́мах в рабо́те** эштәге хата ♦ **дать про́мах** хата ебәреү; **ма́лый (па́рень) не про́мах** *прост.* төшөп ҡалғандарҙан түгел

**ПРОМА́ХИВАТЬСЯ** *несов. см.* **промахну́ться**

**ПРОМАХНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** яҙа атыу (ебәреү, һуғыу һ.б.), тейҙермәү, тейҙерә алмау; **вы́стрелил и промахну́лся** аттым да тейҙерә алманым **2.** *перен., разг.* (*ошибиться*) яңылышыу, хаталаныу, хата ебәреү

**ПРОМА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **промочи́ть**

**ПРОМЕДЛЕ́НИЕ** *с* яйлау, һуҙылыу, тотҡарлыҡ

**ПРОМЕ́ДЛИТЬ** *сов.* яйлатыу, һуҙыу, тотҡарлау, һуңлатыу, оҙаҡлатыу; **проме́длить с отве́том** яуапты оҙаҡлатыу

**ПРОМЕ́ЖНОСТЬ** *ж* бот араһы, сат

**ПРОМЕЖУ́ТОК** *м* **1.** (*пространство*) ара, аралыҡ; **промежу́ток ме́жду столба́ми** бағаналар араһы **2.** (*интервал*) ара, ваҡыт, мәл; **промежу́ток в пять лет** биш йыл араһы

**ПРОМЕЖУ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ике аралағы; **промежу́точная полоса́** ике аралағы һыҙат **2.** аралаш, урта, ике урталағы, ике арала; **промежу́точная ста́дия** урта стадия; **промежу́точные сло́и населе́ния** халыҡтың ике аралағы ҡатламы; **промежу́точные ви́ды** *биол.* аралаш төрҙәр

**ПРОМЕ́ЛЬКИВАТЬ** *несов. см.* **промелькну́ть**

**ПРОМЕЛЬКНУ́ТЬ** *сов.* **1.** күренеп (күҙгә салынып) ҡалыу, елдереп (елеп) үтеп китеү, ялт итеп ҡалыу; **вса́дник промелькну́л** һыбайлы елеп үтеп китте **2.** *перен.* (*о мысли, воспоминании и т.п.*) сағылып ҡалыу (китеү); **мысль промелькну́ла в голове́** башта уй сағылып китте **3.** (*о времени*) бик тиҙ үтеү, тиҙ генә үтеп китеү; **день промелькну́л незаме́тно** көн һиҙелмәй генә үтеп китте

**ПРОМЕ́НИВАТЬ** *несов. см.* **променя́ть**

**ПРОМЕНЯ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*обменять*) алыштырыу, алмаштырыу, алышыу **2.** *на кого-что* (*предпочесть*) артыҡ күреү, алмаштырыу ♦ **променя́ть куку́шку на я́стреба** ҡайыш биреп, йүкә алыу

**ПРОМЕ́Р** *м см.* **проме́рить** — **проме́ривать** — **промеря́ть**

**ПРОМЕРЗА́ТЬ** *несов. см.* **промёрзнуть**

**ПРОМЁРЗЛЫЙ,** -ая, -ое ныҡ туңған, туңып ҡатҡан, үтәнән-үтә туңған; **промёрзлая по́чва** туңып ҡатҡан тупраҡ

**ПРОМЁРЗНУТЬ** *сов.* **1.** ныҡ туңыу, үтәнән-үтә туңыу; **река́ промёрзла** йылға үтәнән-үтә туңған **2.** (*окоченеть*) ныҡ өшөү, ҡатыу, ныҡ туңыу **3.** (*мёрзнуть в течение какого-л. времени*) туңып (өшөп) бөтөү; **промёрзнуть до утра́** иртәнгә тиклем өшөп бөтөү

**ПРОМЕ́РИВАТЬ** *несов. см.* **проме́рить**

**ПРОМЕ́РИТЬ** и *разг.* **ПРОМЕ́РЯТЬ** *сов.* **1.** *что* үлсәү, үлсәп алыу (сығыу); **проме́рить глубину́ зали́ва** ҡултыҡтың тәрәнлеген үлсәп сығыу **2.** *что* и *без доп.* (*ошибиться при измерении*) үлсәгәндә яңылышыу (хаталаныу)

**ПРОМЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **проме́рить**

**ПРОМЕСИ́ТЬ** *сов. что* яҡшылап иҙеү, еткерә баҫыу; **промеси́ть те́сто** ҡамырҙы еткерә баҫыу

**ПРОМЕСИ́ТЬСЯ** *сов. что* яҡшы иҙелеү, еткерә баҫылыу (*балсыҡ, ҡамыр һ.б.*)

**ПРОМЕСТИ́** *сов. что* һепереү, һепереп сығыу (алыу); **промести́ доро́гу** юлды һепереп сығыу

**ПРОМЕТА́ТЬ I** *сов. что* и *без доп.* кәбән (эҫкерт) ҡойоу (һалыу) (*күпмелер ваҡыт*); **це́лый день промета́ть стога́** көн буйы кәбән һалыу

**ПРОМЕТА́ТЬ II** *сов. что* **1.** типсеү, типсеп сығыу; **промета́ть шов** йөйҙө типсеп сығыу **2.** (*обметать*) йүрмәү, йүрмәп сығыу; **промета́ть пе́тли** элмәктәрҙе йүрмәп сығыу

**ПРОМЕТА́ТЬ III** *несов. см.* **промести́**

**ПРОМЁТЫВАТЬ** *несов. см.* **промета́ть** II

**ПРОМЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **промеси́ть**

**ПРОМЕ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **промеси́ться 2.** *страд. от* **проме́шивать**

**ПРОМЕ́ШКАТЬ** *сов.*; *разг.* әкрен (яй, оҙаҡ) ҡыланыу, мыштырлау, яй ҡуҙғалыу, һуҙылыу; **проме́шкать неде́лю** аҙна буйына һуҙылыу

**ПРОМИНА́ТЬ** *несов. см.* **промя́ть**

**ПРОМО́ЗГЛЫЙ,** -ая, -ое дымлы, еүеш, ҡарлы-ямғырлы, йонсоу, һыуыҡ; **промо́зглая о́сень** ҡарлы-ямғырлы көҙ

**ПРОМО́ИНА** *ж* **1.** (*впадина в земле, промытая ливнем*) йырын, уйым **2.** (*полынья*) йылыу, ҡаран

**ПРОМОКА́ТЕЛЬНЫЙ: промока́тельная бума́га** киптергес, һурғыс

**ПРОМОКА́ТЬ I** *несов.* **1.** *см.* **промо́кнуть 2.** (*пропускать влагу*) һыу үткәреү (үтеү), еүеш (дым) үткәреү; **сапоги́ промока́ют** итектәр һыу үткәрә

**ПРОМОКА́ТЬ II** *несов. см.* **промокну́ть**

**ПРОМОКА́ШКА** *ж*; *разг.* киптергес, һурғыс (*ҡағыҙ*)

**ПРОМО́КНУТЬ** *сов.* һыуланыу, еүешләнеү, лысма һыу булыу; **промо́кнуть под дождём** ямғырҙа лысма һыу булыу

**ПРОМОКНУ́ТЬ** *сов. что* (*осушить чем-л.*) киптереү, һурҙырыу

**ПРОМО́ЛВИТЬ** *сов. что* әйтеү, әйтеп биреү, әйтә һалыу; **не промо́лвить ни сло́ва** бер һүҙ ҙә әйтмәү

**ПРОМОЛЧА́ТЬ** *сов.* **1.** өндәшмәү, өндәшмәй ҡалыу, бер һүҙ ҙә әйтмәү, яуап бирмәү; **он промолча́л об э́том** ул был хаҡта өндәшмәне **2.** өндәшмәү, өндәшмәй тороу (*ҡүпмелер ваҡыт*)

**ПРОМОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **проморо́зить**

**ПРОМОРГА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ауыҙ асып (аңшайып) тороп ҡалыу, ысҡындырыу; **проморга́ть удо́бный моме́нт** уңайлы ваҡытты ысҡындырыу

**ПРОМОРИ́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* **1.** ас тотоу, асҡа интектереү; **промори́ть го́лодом** асҡа интектереү **2.** (*заставить долго ждать*) оҙаҡ көттөрөү, көттөрөп ялҡытыу (интектереү)

**ПРОМОРО́ЗИТЬ** *сов. кого-что* **1.** ныҡ туңдырыу; **проморо́зить мя́со** итте ныҡ туңдырыу; **по́чву си́льно проморо́зило** *безл.* тупраҡты ныҡ туңдырған **2.** *разг.* ныҡ һыуытыу; **проморо́зить ко́мнату** бүлмәне ныҡ һыуытыу **3.** *разг.* һалҡында тотоу, өшөтөү (*ҡүпмелер ваҡыт*); **проморо́зить люде́й на у́лице** кешеләрҙе урамда өшөтөү

**ПРОМОТА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* туҙҙырып (таратып, тотоноп) бөтөү, елгә осороу, сарыф итеү (*аҡсаны, мал-мөлкәтте һ.б.*)

**ПРОМОТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бөлөү, ярлыланыу (*мал-мөлкәтте туҙҙырып*)

**ПРОМОЧИ́ТЬ** *сов. что* еүешләү, еүешләтеү, сылатыу, һыулау, һыу үткәреү; **промочи́ть но́ги** аяҡты еүешләү

**ПРОМТОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое промтауар(ҙар) ...ы; **промтова́рный магази́н** промтауарҙар магазины

**ПРОМТОВА́РЫ** *только мн.* промтауарҙар; **прода́жа промтова́ров** промтауарҙар һатыу

**ПРОМУ́ЧИТЬ** *сов. кого-что* интектереү, яфалау, этләү, ғазаплау (*ҡүпмелер ваҡыт*)

**ПРОМУ́ЧИТЬСЯ** *сов.* интегеү, яфаланыу, этләнеү, ғазапланыу (*ҡүпмелер ваҡыт*)

**ПРОМЧА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* саптырып (елдереп, шәп итеп) алып китеү, (бик тиҙ) үткәреү **2.** *разг. см.* **промча́ться** 1

**ПРОМЧА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** сабып (елеп) үтеү, бик тиҙ (елеп) үтеп китеү; **вса́дник промча́лся** һыбайлы елеп үтеп китте **2.** (*о времени, событии*) бик тиҙ үтеү; **промча́лись го́ды** йылдар бик тиҙ үтеп китте

**ПРОМЫВА́ТЬ** *несов. см.* **промы́ть**

**ПРОМЫ́ВКА** *ж см.* **промы́ть** – **промыва́ть** 1, 2; **промы́вка золотоно́сного песка́** алтынлы ҡомдо йыуыу

**ПРО́МЫСЕЛ** *м* **1.** һөнәр, кәсеп, эш, эшләү; **охо́тничий про́мысел** һунарсылыҡ кәсебе; **отхо́жий про́мысел** ситкә йөрөп эшләү **2.** ау, һунар; **отпра́виться на про́мысел тюле́ня** тюлень һунарына китеү **3.** *обычно мн.* **про́мыслы** промыслалар; **нефтяны́е про́мыслы** нефть промыслалары

**ПРОМЫ́СЛИТЬ** *сов. кого-что*; *уст.*, *прост.* аулау, тотоу; **промы́слить зве́ря** кейек аулау

**ПРОМЫСЛОВИ́К** *м* **1.** (*тот, кто занимается охотой, рыболовством как промыслом*) аусы, һунарсы, промысловик **2.** (*работающий на промыслах*) промысласы

**ПРОМЫСЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** кәсеп ...ы, промысла ...ы; **промысло́вая коопера́ция** промысла ширҡәте **2.** (*являющийся предметом промысла*) һунар ...ы, ау ...ы; **промысло́вый зверь** һунар кейеге **3.** (*предназначенный для охотничьего или рыболовного промысла*) промысла ...ы; **промысло́вый флот** промысла флоты

**ПРОМЫ́ТЬ** *сов. что* **1.** йыуыу, йыуҙырыу, йыуҙыртыу; **промы́ть ра́ну** яраны йыуыу; **промы́ть желу́док** *мед.* ашҡаҙанды йыуҙыртыу **2.** *спец.* йыуҙырыу; **промы́ть желе́зную руду́** тимер мәғдәнен йыуҙырыу **3.** йыуып (йыуҙырып) алып китеү (йырыу); **промы́ть плоти́ну** быуаны йыуып йырыу

**ПРОМЫЧА́ТЬ** *сов.* **1.** мөңрәп ҡуйыу; **коро́ва промыча́ла** һыйыр мөңрәп ҡуйҙы **2.** *что*; *разг.* мығырлау, мығырлап ҡуйыу

**ПРОМЫ́ШЛЕННИК** *м* **1.** промышленник, сәнәғәтсе (*сәнәғәт предприятиеһы хужаһы*); **сою́з промы́шленников** сәнәғәтселәр союзы **2.** *см.* **промыслови́к** 1

**ПРОМЫ́ШЛЕННОСТЬ** *ж* промышленность, сәнәғәт; **тяжёлая промы́шленность** ауыр сәнәғәт

**ПРОМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** промышленность ...ы, сәнәғәт ...ы; **промы́шленное предприя́тие** сәнәғәт предприятиеһы **2.** промышленность ...ы, сәнәғәтле; **промы́шленный райо́н** сәнәғәтле район **3.** *спец. см.* **промысло́вый**

**ПРОМЫШЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **промы́слить** **2.** *чем* кәсеп итеү, шөғөлләнеү; **промышля́ть охо́той** һунарсылыҡ менән шөғөлләнеү

**ПРОМЯ́МЛИТЬ** *сов. что*; *разг.* ыҡ-мыҡ итеү (килеү)

**ПРОМЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* иҙеү, баҫып иҙеү; **промя́ть гли́ну** балсыҡ иҙеү **2.** *что* (*продавить*) йәмшәйтеү, баҫып (ҡыҫып) йәнсеү, һығылдырыу; **промя́ть стул** ултырғысты йәмшәйтеү **3.** *кого* йөрөтөп яҙылдырыу, йөрөтөп алыу; **промя́ть ло́шадь** атты йөрөтөп алыу ♦ **промя́ть но́ги** аяҡты йөрөп яҙылдырыу

**ПРОМЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йәмшәйеү, баҫып (ҡыҫып) йәнселеү, һығылыу; **дива́н промя́лся** диван

йәмшәйеп төштө **2.** *разг.* (*размяться*) йөрөп (хәрәкәтләнеп) яҙылыу

**ПРОНЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* күтәреп барыу (алып барыу); **пронести́ чемода́н до ваго́на** сумаҙанды вагонға тиклем алып барыу **2.** *что* (*неся, переместить*) күтәреп уҙыу (үтеү), күтәреп индереү (алып сығарыу, менеү һ.б.); **пронести́ роя́ль че́рез дверь** роялде ишектән күтәреп сығарыу **3.** *кого-что* (*промчать*) елдереп (саптырып) алып китеү **4.** *что*; *перен.* күңелдә һаҡлау (тотоу); **пронести́ любо́вь че́рез всю жизнь** мөхәббәтте ғүмер буйына күңелдә һаҡлау **5.** *что* и *без доп. обычно безл.* үтеү, үтеп китеү, алып китеү; **бу́рю пронесло́** дауыл үтеп китте; **ве́тер пронёс ту́чу** ел болотто алып китте

**ПРОНЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** елдереп (сабып, елеп) үтеп китеү, (бик шәп) уҙып китеү; **автомоби́ль пронёсся ми́мо нас** автомобиль беҙҙең эргәнән елеп үтеп китте **2.** (*о звуке, голосе и т.п.*) яңғырау, яңғырап китеү **3.** (*о слухе, вести и т.п.*) таралыу, таралып китеү; **молва́ пронесла́сь** имеш-мимеш таралып китте **4.** *перен.* (*промелькнуть — о мыслях и т.п.*) сағылыу, сағылып китеү (ҡалыу) **5.** (*о времени*) бик тиҙ үтеү, елеп үтеү; **пронесли́сь го́ды** йылдар үтеп китте

**ПРОНЗА́ТЬ** *несов. см.* **пронзи́ть**

**ПРОНЗИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** әсе, киҫкен; **пронзи́тельный свист** әсе һыҙғырыу; **пронзи́тельная боль** әсе һыҙлау **2.** (*о холоде, ветре и т.п.*) әсе, үҙәккә үткес, ыжғыр; **пронзи́тельный ве́тер** әсе ел **3.** (*о взгляде*) үткер; **пронзи́тельный взгляд** үткер ҡараш

**ПРОНЗИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** сәнсеү, ҡаҙау, сәнсеп тишеү, үтә тишеү; **пронзи́ть штыко́м** штык менән сәнсеү **2.** *перен.* үтеп инеү, ярып үтеү (*уй, фекер һ.б. хаҡында*) ♦ **пронзи́ть взгля́дом** тишә (тишерҙәй итеп) ҡарау; **пронзи́ть ду́шу (се́рдце)** күңелде әрнетеү, йөрәк итен телгеләү

**ПРОНИЗА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чем* (епкә, бауға) теҙеү, теҙеп биҙәү **2.** *кого-что*; *перен.* (*пробрать — о холоде, ветре*) үҙәккә (елеккә) үтеү; **меня́ прониза́л хо́лод** һыуыҡ үҙәгемә үтте

**ПРОНИ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **прониза́ть**

**ПРОНИ́ЗЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **прони́зывать 2.** *прил.* (*о ветре, холоде*) әсе, киҫкен, ыҙғыр, ыжғыр, үҙәккә үткес **3.** *прил.* (*о взгляде, глазах*) үткер; **прони́зывающий взгляд** үткер ҡараш

**ПРОНИКА́ТЬ** *несов. см.* **прони́кнуть**

**ПРОНИКА́ТЬСЯ** *несов. см.* **прони́кнуться**

**ПРОНИКНОВЕ́ННОСТЬ** *ж* үткерлек, тәьҫирлелек; **проникнове́нность взгля́да** ҡараштың үткерлеге

**ПРОНИКНОВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое әҫәрле, үткер, ысын күңелдән һөйләнгән, тәьҫирле; **проникнове́нная речь** ысын күңелдән һөйләнгән телмәр

**ПРОНИ́КНУТЬ** *сов.* **1.** (үтеп) инеү; **прони́кнуть в дом** өйгә инеү; **свет проника́ет в ко́мнату** яҡтылыҡ бүлмәгә үтеп инә **2.** (*распространиться*) үтеп инеү, таралыу; **но́вые иде́и прони́кли в ма́ссы** яңы идеялар массаларға таралды **3.** *во что*; *перен.* аңлау, төшөнөү; **прони́кнуть в суть де́ла** эштең асылын аңлау

**ПРОНИ́КНУТЬСЯ** *сов. что* һуғарылыу, тәьҫирләнеү; **прони́кнуться любо́вью** һөйөү менән һуғарылыу

**ПРОНИМА́ТЬ** *несов. см.* **проня́ть**

**ПРОНИЦА́ЕМОСТЬ** *ж* үткәреүсәнлек; **проница́емость во́здуха** һауа үткәреүсәнлеге

**ПРОНИЦА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **проница́ть 2.** *прил.* үткәрә торған, үткәреүсән; **проница́емые поро́ды** үткәреүсән тоҡомдар

**ПРОНИЦА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* һиҙгерлек, зирәклек, үтә күреүсәнлек; **проница́тельность ума́** аҡылдың зирәклеге

**ПРОНИЦА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое үтә зирәк, ныҡ һиҙгер, үтә күреүсән; **проница́тельный челове́к** үтә зирәк кеше

**ПРОНОСИ́ТЬ I** *несов. см.* **пронести́**

**ПРОНОСИ́ТЬ II** *сов.* **1.** *что* кейеү, кейеп йөрөү (*күпмелер ваҡыт*); **проноси́ть костю́м це́лый год** костюмды йыл буйы кейеү **2.** *что*; *разг.* кейеп туҙҙырыу (тишеү, тетелдереү); **проноси́ть о́бувь до дыр** аяҡ кейемен тишкәнсе кейеп туҙҙырыу

**ПРОНОСИ́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **пронести́сь 2.** *страд. от* **проноси́ть** I

**ПРОНОСИ́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* кейелеү, оҙаҡҡа етеү (сыҙау); **костю́м проноси́лся до́лго** костюм оҙаҡ кейелде **2.** туҙыу, тетелеү; **боти́нки проноси́лись** ботинкалар туҙҙы

**ПРОНУМЕРО́ВА́ТЬ** *сов. что* номерлап сығыу, номер һуғып сығыу

**ПРОНУМЕРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **пронумерова́ть**

**ПРОНЫ́РА** *м* и *ж*; *разг.* әрһеҙ, йылмайаҡ, һәрәпсе

**ПРОНЫ́РЛИВОСТЬ** *ж*; *разг.* әрһеҙлек, һәрәпселек, йылмайаҡлыҡ

**ПРОНЫ́РЛИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* әрһеҙ, йылмайаҡ, һәрәпсел

**ПРОНЮ́ХАТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *прост.* һиҙеп (белеп) ҡалыу, аҫтыртын ғына белеп алыу, еҫкәнеп (эҙләнеп) белеү

**ПРОНЮ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **пронню́хать**

**ПРОНЯ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** үтәләй үтеү, елеккә үтеү; **моро́з про́нял** һалҡын елеккә үтте **2.** *перен.* ныҡ тәьҫир итеү, еңеү; **его́ ниче́м не проймёшь** уны бер нисек тә еңеп булмай

**ПРОО́БРАЗ** *м* **1.** (*образ будущего*) киләсәк өсөн үрнәк, киләсәктең өлгөһө **2.** (*прототип*) прообраз

**ПРОПАГА́НДА** *ж* пропаганда; **вести́ пропага́нду** пропаганда алып барыу

**ПРОПАГАНДИ́РОВАТЬ** *несов. что* пропагандалау; **пропаганди́ровать иде́и добра́** изгелек идеяларын пропагандалау

**ПРОПАГАНДИ́СТ** *м* и **ПРОПАГАНДИ́СТКА** *ж* пропагандасы; **семина́р пропаганди́стов** пропагандасылар семинары

**ПРОПАГАНДИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое пропаганда ...ы; **пропаганди́стская рабо́та** пропаганда эше

**ПРОПАДА́ТЬ** *несов. см.* **пропа́сть ♦ где на́ше не пропада́ло!; где на́ша не пропада́ла!** ни булһа, шул булыр!

**ПРО́ПАДОМ: пропади́ про́падом!** дөмөгөп кит!, суҡынып кит!, дөмөккөрө!, суҡынып киткере!

**ПРОПА́ЖА** *ж* **1.** *см.* **пропа́сть — пропада́ть** 1; **2.** юғалған нәмә; **найти́ пропа́жу** юғалған нәмәне табыу

**ПРОПА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **прополо́ть** 1

**ПРОПА́РИВАТЬ** *несов. см.* **пропа́рить**

**ПРОПА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пропа́риться** 1, 2; **2.** *страд. от* **пропа́ривать**

**ПРОПА́РИТЬ** *сов. что* **1.** (яҡшылап) бешекләү, парлау; (*веник*) бешереү; **пропа́рить о́вощи** йәшелсәне бешекләү **2.** (*в бане*) яҡшылап сабыныу, парланыу **3.** (*продуть паром*) пар менән өрҙөрөү, пар менән таҙартыу

**ПРОПА́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** парланыу, бешекләнеү; **о́вощи пропа́рились** йәшелсә бешекләнгән **2.** (*в бане*) яҡшылап сабыныу, парланыу **3.** бешекләнеп алыу, парланыу, сабыныу (*бер аҙ ваҡыт*)

**ПРОПА́РЫВАТЬ** *несов. см.* **пропоро́ть**

**ПРО́ПАСТЬ** *ж* **1.** упҡын, ярлау; **край про́пасти** упҡын сите **2.** *перен.* (*между кем-чем-л.*) ҙур айырма; **обнару́жить про́пасть** ҙур айырма табыу **3.** *кого-чего*; *разг.* бик күп, бихисап, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ; **про́пасть наро́ду** халыҡ бик күп

**ПРОПА́СТЬ** *сов.* **1.** юғалыу, юҡ (ғәйеп) булыу, юҡҡа сығыу; **докуме́нты пропа́ли** документтар юғалған **2.** (*перестать появляться*) күренмәү, юғалып тороу, ғәйеп булыу; **пропа́сть на неде́лю** бер аҙна юғалып тороу **3.** (*скрыться*) юҡҡа сығыу, юғалыу, күҙҙән китеү **4.** (*утратиться*) бөтөү, юҡҡа сығыу; **у него́ пропа́л го́лос** уның тауышы бөткән **5.** (*погибнуть, умереть*) һәләк булыу, юҡҡа сығыу **6.** (*пройти бесполезно*) әрәм булыу, бушҡа (заяға) китеү (үтеү); **весь день пропа́л** тотош көн бушҡа үтте ♦ **пропа́сть бе́з вести** *см.* **весть**; **пиши́ пропа́ло** китте баш (*ауыр хәлгә ҡалғанда*); **пропади́ про́падом!** *см.* **про́падом**

**ПРОПАХА́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* һөрөү, һөрөп сығыу; **пропаха́ть глубоко́** тәрән һөрөү

**ПРОПА́ХИВАТЬ** *несов. см.* **пропаха́ть**

**ПРОПА́ХНУТЬ** *сов.* **1.** *чем* еҫ һеңеү; **пропа́хнуть ды́мом** төтөн еҫе һеңеү **2.** *разг.* еҫләнеү, һаҫыу, еҫ инеү; **мя́со пропа́хло** ит еҫләнгән

**ПРОПА́ШКА** *ж см.* **пропаха́ть — пропа́хивать**; **ра́нняя пропа́шка земли́** ерҙе иртә һөрөү

**ПРОПА́ШНИК** *м*; *с.-х.* бураҙна ярғыс; **ко́нный пропа́шник** ат менән бураҙна ярғыс

**ПРОПАШНО́Й,** -ая, -ое *с.-х.* **1.** һыҙма, һыҙып үтмәле; **пропашно́й тра́ктор** һыҙма трактор **2.** аралыҡлы, рәт аралы; **пропашны́е культу́ры** аралыҡлы культуралар

**ПРОПА́ЩИЙ,** -ая, -ее *разг.* **1.** (*неудавшийся*) өмөтһөҙ, ышанысһыҙ; **пропа́щее де́ло** ышанысһыҙ эш; **пропа́щая жизнь** өмөтһөҙ тормош **2.** юғалған; **пропа́щая коза́** юғалған кәзә **3.** *в знач. сущ.* **пропа́щий** *м* и **пропа́щая** *ж* юғалып тороусы кеше, аҙман **4.** (*неисправимый*) бөткән, юҡҡа сыҡҡан, төҙәлеүҙән үткән; **пропа́щий челове́к** юҡҡа сыҡҡан кеше

**ПРОПЕКА́ТЬ** *несов. см.* **пропе́чь**

**ПРОПЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пропе́чься 2.** *страд. от* **пропека́ть**

**ПРОПЕ́ЛЛЕР** *м* пропеллер; **пропе́ллер самолёта** самолёт пропеллеры

**ПРОПЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** йырлау, йырлап алыу; (*о музыкальном инструменте*) уйнау; **пропе́ть пе́сню** йыр йырлау **2.** *обычно без доп.* (*о птице*) һайрау; (*о петухе*) ҡысҡырыу **3.** *разг.* (йырлап) бөтөрөү; **пропе́ть го́лос** йырлап тауышты бөтөрөү

**ПРОПЕ́ЧЬ** *сов. что* бешереп сығарыу (еткереү); **пропе́чь пиро́г** бәлеште бешереп сығарыу

**ПРОПЕ́ЧЬСЯ** *сов.* бешеп сығыу (етеү); **хлеб пропёкся** икмәк бешеп сыҡҡан

**ПРОПИВА́ТЬ** *несов. см.* **пропи́ть**

**ПРОПИ́Л** *м*; *спец.* **1.** *см.* **пропили́ть — пропи́ливать 2.** бысым, бысҡан урын; **сде́лать широ́кий пропи́л** киң бысым яһау

**ПРОПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **пропили́ть** 1, 2

**ПРОПИЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* бысыу, бысып төшөрөү; **пропили́ть до́ску** таҡтаны бысып төшөрөү **2.** *что* бысып тишеү, тишеү, уйыу; **пропили́ть око́шко в стене́** стенала тәҙрә уйыу, бысып тишеү **3.** *что* и *без доп.* бысыу (*күпмелер ваҡыт*); **пропили́ть це́лый день** көнө буйы бысыу

**ПРОПИСА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* яҙҙырыу, теркәү; **прописа́ть жильца́** йәшәүсене теркәү **2.** *что* и *с неопр.* яҙыу, билдәләү; **прописа́ть больно́му лека́рство** ауырыуға дарыу яҙыу **3.** *что* и *без доп.* яҙыу (*күпмелер ваҡыт*); **прописа́ть це́лый час** сәғәт буйы яҙыу

**ПРОПИСА́ТЬСЯ** *сов.* яҙылыу, теркәлеү; **прописа́ться по но́вому а́дресу** яңы адрес буйынса теркәлеү

**ПРОПИ́СКА** *ж* прописка, яҙылыу, теркәлеү (*йәшәгән урынды рәсми күрһәтеү*); **постоя́нная пропи́ска** даими теркәлеү

**ПРОПИСНО́Й,** -ая, -ое **1.** теркәү ...ы, прописка ...ы; **прописно́й листо́к** теркәү ҡағыҙы **2.** билдәле, тапалған; **прописна́я и́стина** билдәле

хәҡиҡәт; **прописна́я мора́ль** (күптән) билдәле әхлаҡ ♦ **прописны́е бу́квы** баш хәрефтәр

**ПРОПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **прописа́ть** 1, 2

**ПРОПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прописа́ться 2.** *страд. от* **прописывать**

**ПРО́ПИСЬ** *ж* **1.** яҙыу өлгөһө; **учи́ться писа́ть по про́писям** яҙыу өлгөләре буйынса яҙырға өйрәнеү **2.** *в знач. нареч.* **про́писью** һүҙ менән; **написа́ть число́ про́писью** һанды һүҙ менән яҙыу

**ПРОПИТА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **пропита́ть** I – **пропита́ться** I; **2.** аҙыҡ, ашамлыҡ, ризыҡ; **тра́тить де́ньги на пропита́ние** аҡсаны аҙыҡҡа тотоноу

**ПРОПИТА́ТЬ I** *сов. кого-что*; *разг.*, *уст.* туйҙырыу, ашатыу, тамағын ҡарау

**ПРОПИТА́ТЬ II** *сов. что* **1.** һеңдереү, туйындырыу, мансыу; **пропита́ть зе́млю водо́й** ерҙе һыуға туйындырыу; **пропита́ть ма́слом** май һеңдереү **2.** *перен.*, *разг.* (*пронизать*) һуғарыу; **пропита́ть любо́вью** һөйөү менән һуғарыу

**ПРОПИТА́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* туйыныу, ашау, тамаҡ аҫрау

**ПРОПИТА́ТЬСЯ II** *сов. что* **1.** һеңеү, туйыныу; **пропита́ться за́пахом ры́бы** балыҡ еҫе һеңеү **2.** *перен.*, *разг.* (*проникнуться*) һуғарылыу; **пропита́ться но́выми иде́ями** яңы идеялар менән һуғарылыу

**ПРОПИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **пропита́ть** II

**ПРОПИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пропита́ться** II; **2.** *страд. от* **пропи́тывать**

**ПРОПИ́ТЬ** *сов. что* **1.** эсеп бөтөрөү, эсеүгә тотоноп бөтөү; **пропи́ть де́ньги** аҡсаны эсеүгә тотоноп бөтөү **2.** *разг.* эсеп зыян килтереү, эсеп юғалтыу; **пропи́ть тала́нт** һәләтте эсеп юғалтыу

**ПРОПИ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **пропихну́ть**

**ПРОПИХНУ́ТЬ** *сов.*; *прост.* этеп (ҡыҫтап) индереү, көс-хәл менән индереү; **пропихну́ть шкаф в дверь** шкафты ишектән этеп индереү

**ПРОПЛА́КАТЬ** *сов.* илап ултырыу (сығыу, үткәреү); **пропла́кать всю ночь** төнө буйы илап сығыу ♦ **пропла́кать все глаза́** илай-илай күҙҙе бөтөрөү

**ПРОПЛА́КАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы илау, илап туйыу

**ПРОПЛЕ́СНЕВЕТЬ** *сов.* күгәреү, үңәҙләнеү; **хлеб пропле́сневел** икмәк күгәргән

**ПРОПЛУТА́ТЬ** *сов.*; *разг.* аҙашып (буталып) йөрөү (*күпмелер ваҡыт*)

**ПРОПЛЫ́В** *м* **1.** *см.* **проплы́ть** 1, 2; **2.** *спорт.* (*состязание*) йөҙөү ярышы, йөҙөп үткән ара; **проплы́в на 500 ме́тров** 500 метрға йөҙөү ярышы

**ПРОПЛЫВА́ТЬ** *несов. см.* **проплы́ть** 1–3

**ПРОПЛЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* йөҙөп барыу (үтеү); **парохо́д проплы́л** пароход йөҙөп үтте; **проплы́ть ты́сячу ме́тров** мең метр араны йөҙөп үтеү **2.** *что* и *без доп.* (әргәһенән) йөҙөп үтеү; **проплы́ть о́стров** утрау әргәһенән йөҙөп үтеү **3.** *перен.* (*плавно пройти*, *пролететь*) талғын ғына (осоп) үтеү **4.** йөҙөү, йөҙөп йөрөү (*күпмелер ваҡыт*)

**ПРОПЛЯСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* бейеү, бейеп алыу (ташлау); **проплясать гопа́к** гопакты бейеү **2.** *что* и *без доп.* бейеү, бейеп үткәреү (*күпмелер ваҡыт*)

**ПРОПЛЯ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **проплясать** 1

**ПРОПОВЕ́ДАТЬ** *уст.* **1.** *сов. см.* **пропове́довать 2.** *несов. см.* **пропове́довать**

**ПРОПОВЕ́ДНИК** *м* и **ПРОПОВЕ́ДНИЦА** *ж* **1.** (*распространитель вероучения*) дингә өндәүсе, дин таратыусы **2.** (*произносящий проповеди*) вәғәз һөйләүсе, вәғәзсе **3.** *чего*; *перен.* (*сторонник какого-л. учения*, *идей и т.п.*) тәғлимәт (идея, ҡараш һ.б.) таратыусы

**ПРОПОВЕ́ДОВАТЬ** *несов.* **1.** *что* дингә өндәү, дин таратыу **2.** *без доп.* вәғәз һөйләү, вәғәзләү **3.** *чего*; *перен.* тәғлимәт (ҡараш, идея һ.б.) таратыу

**ПРО́ПОВЕДЬ** *ж* **1.** *см.* **пропове́довать 2.** вәғәз; **воскре́сная про́поведь** йәкшәмбе вәғәзе **3.** *перен.*, *разг.* өгөт, өгөт-нәсихәт; **принима́ться за про́поведь** өгөт-нәсихәткә тотоноу

**ПРОПО́ЙЦА** *м*; *прост.* эскесе, сәрхүш

**ПРОПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **проползти́**

**ПРОПОЛЗТИ́** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* шыуышып (үрмәләп) үтеү; **проползти́ по земле́** ерҙән шыуышып үтеү; **проползти́ де́сять ме́тров** ун метр шыуышып үтеү **2.** *разг.* (*медленно пройти*, *проехать и т.п.*) һөйрәлеп саҡ-саҡ үтеү

**ПРО́ПОЛИС** и **ПРОПО́ЛИС** *м*; *пчел.* прополис, бал ҡорто (*умартаға ягылып ҡала*)

**ПРОПО́ЛКА** *ж см.* **пропо́лоть** – **пропа́лывать** 1

**ПРОПОЛОСКА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* сайҡау, сайҡап алыу; **прополоска́ть бельё** кер сайҡау; **прополоска́ть го́рло** тамаҡ сайҡау **2.** *что* и *без доп.* сайҡау, сайҡап тороу (*күпмелер ваҡыт*), сайҡап ваҡыт үткәреү; **прополоска́ть лён до обе́да** киндерҙе төшкә тиклем сайҡау

**ПРОПОЛО́ТЬ** *сов.* **1.** *что* утау, утап сығыу; **прополо́ть свёклу** сөгөлдөр утау **2.** *что* и *без доп.* утау (*күпмелер ваҡыт*); **прополо́ть весь день** көнө буйы утау

**ПРОПО́ЛОЧНЫЙ**, -ая, -ое утау ...ы; **про́полочные рабо́ты** утау эштәре

**ПРОПОРО́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* ярып ебәреү, йыртыу, йыртып сығарыу; **пропоро́ть брю́ки** салбарҙы йыртып ебәреү **2.** *кого-что* сәнсеү, ҡаҙау, сәнсеп яралау (тишеү), тишә төртөү; **пропоро́ть живо́т** ҡорһаҡты сәнсеп яралау

**ПРОПОРЦИОНА́ЛЬНОСТЬ** *ж* пропорционаллек, пропорциональ булыу

**ПРОПОРЦИОНА́ЛЬНЫЙ**, -ая, -ое **1.** (*соразмерный*) пропорциональ, нисбәтле; **пропорциона́льное сложе́ние те́ла** тәндең пропорциональ төҙөлөшө **2.** *мат.* пропорциональ; **обра́тно пропорциона́льные величи́ны** кире пропорцио-

наль дәүмәлдәр; **пря́мо пропорциона́льные величи́ны** тура пропорциональ дәүмәлдәр

**ПРОПО́РЦИЯ** *ж* **1.** пропорция, нисбәт; **пропо́рция ме́жду о́бщим и ча́стным** дөйөм менән айырымдың нисбәте **2.** *мат.* пропорция; **геометри́ческая пропо́рция** геометрик пропорция

**ПРОПОТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** нык тирләү, тиргә батыу; **пропоте́ть в ба́не** мунсала нык тирләү **2.** *разг.* тир һеңеү, тиргә ҡатыу; **руба́шка пропоте́ла** күлдәккә тир һеңде **3.** *над чем* и *без доп.*; *перен.*, *прост.* тир түгеү, тирләп-бешеп аҙапланыу (маташыу); **пропоте́ть по́лдня над статьёй** мәҡәлә өҫтөндә тирләп-бешеп ярты көн аҙапланыу

**ПРО́ПУСК** *м* **1.** *см.* **пропусти́ть** — **пропуска́ть**; **про́пуск зри́телей в зал** тамашасыларҙы залға үткәреү; **про́пуск слов в те́ксте** текста һүҙҙәрҙе төшөрөп ҡалдырыу **2.** (*мн.* **пропуска́**) пропуск (*документ*); **предъяви́ть про́пуск** пропускыны күрһәтеү **3.** (*мн.* **пропуска́**) *см.* **паро́ль** **4.** (*мн.* **про́пуски**) (*выброшенная часть текста*) төшөп ҡалған урын (өлөш, киҫәк һ.б.) **5.** (*мн.* **про́пуски**) килмәү, килмәй ҡалыу, ҡалдырыу; **про́пуск уро́ков** дәрестәр ҡалдырыу

**ПРОПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **пропусти́ть**

**ПРОПУСКНО́Й**, -ая, -ое үткәреү ...ы, пропуск ...ы; **пропускно́й пункт** үткәреү пункты

**ПРОПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* үткәреү, үткәреп ебәреү, юл биреү; **пропусти́ть детéй вперёд** балаларҙы алға үткәреү; **пропусти́ть же́нщину** ҡатынға юл биреү **2.** *кого-что* үткәреү; **пропусти́ть свет** яҡтылыҡ үткәреү **3.** *кого-что* (*позволить въехать, войти*) үткәреү, индереү; **пропусти́ть на вы́ставку** күргәҙмәгә индереү **4.** *что*; *разг.* (*разрешить к печатанию, к постановке*) үткәреү; **пропусти́ть пье́су** пьесаны үткәреү (*сәхнәлә ҡуйырға*) **5.** *что*; *спорт.* (*дать забить*) үткәреү; **пропусти́ть ша́йбу** шайба үткәреү (*ҡапҡаға*) **6.** *что* (*пройти, проехать мимо*) үтеп (уҙып) китеү, ҡалдырыу; **пропусти́ть поворо́т** боролошто үтеп китеү **7.** *что* (*не явиться*) бармай ҡалыу, йөрөмәү, ҡалдырыу; **пропусти́ть уро́к** дәрес ҡалдырыу **8.** *что* (*не заметить*) күрмәй ҡалыу, төшөрөп ҡалдырыу; **пропусти́ть сло́во в дикта́нте** диктантта һүҙ төшөрөп ҡалдырыу **9.** *что*; *разг.* үткәреү; **пропусти́ть прое́кт че́рез коми́ссию** проектты комиссиянан үткәреү; **пропусти́ть во́ду че́рез фильтр** һыуҙы фильтр аша үткәреү **10.** *что* (*продеть*) аша үткәреү; **пропусти́ть ни́тку че́рез ушко́ иго́лки** епте энә күҙәүенән үткәреү ♦ **пропусти́ть ми́мо уше́й** *что* ҡолаҡҡа ла элмәү, ишетмәү; **никого́ не пропусти́ть** бер кемде тыныс ҡалдырмау

**ПРОПЫЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* туҙан (саң) ҡундырыу, туҙанлау; **пропылённая трава́** туҙан ҡунған үлән **2.** *разг.* (*проехать, подняв пыль*) туҙан (саң) туҙҙырып үтеп китеү

**ПРОПЫЛИ́ТЬСЯ** *сов.* туҙанланыу, саңланыу, саңға (туҙанға) батыу

**ПРОРА́Б** *м* прораб (*төҙөлөш эштәренә туранан-тура етәкселек итеүсе*)

**ПРОРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **прорабо́тать** 2, 3

**ПРОРАБО́ТАТЬ** *сов.* **1.** эшләү, эшләп үткәреү; **прорабо́тать на фа́брике три го́да** фабрикала өс йыл эшләү **2.** *что* (*изучить, ознакомиться*) (ентекләп) өйрәнеү; **прорабо́тать но́вые произведе́ния** яңы әҫәрҙәрҙе өйрәнеү **3.** *кого-что*; *разг.* (*подвергнуть критике*) ҡаты тәнҡитләү, ҡыҙҙырыу, бешеү

**ПРОРА́БСКИЙ**, -ая, -ое **1.** прораб ...ы; **прора́бский пункт** прораб пункты **2.** *в знач. сущ.* **прора́бская** *ж* прораб бүлмәһе

**ПРОРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **прорасти́**

**ПРОРАСТИ́** *сов.* **1.** шытыу, шытып сығыу, моронлау; **огурцы́ проросли́** ҡыяр шытып сыҡҡан **2.** (*вырасти, пробиваясь сквозь что-л.*) үтә (аша) үҫеп сығыу, тишеп үҫеү **3.** *чем* и *без доп.* (үҫеп) ҡапланыу; **его́ подборо́док проро́с бородо́й** уның эйәге һаҡал менән ҡапланған

**ПРОРАСТИ́ТЬ** *сов. что* шыттырып алыу (сығарыу); **прорасти́ть семена́** орлоҡтарҙы шыттырып алыу

**ПРОРА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **прорасти́ть**

**ПРО́РВА** *ж* **1.** батҡыл (һаҙлыҡта) **2.** *прост.* бик күп, һанап бөткөһөҙ; **де́нег про́рва** аҡса бик күп **3.** *прост.* убыр, мәскәй (*кеше*)

**ПРОРВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* йыртыу, тишеү, тишеп сығарыу; **прорва́ть чуло́к** ойоҡто йыртыу **2.** *что* (*напором проделать отверстие*) йырыу, йырып алып китеү; **прорва́ть плоти́ну** быуаны йырыу **3.** *что* өҙөү; **прорва́ть ли́нию оборо́ны проти́вника** дошмандың оборона һыҙығын өҙөү **4.** *безл.*; *перен.*, *разг.* асыуына түҙә алмау, ҡабынып (туҙынып) китеү; **эк тебя́ сего́дня прорва́ло!** туҙынып киттең бит әй бөгөн!

**ПРОРВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йыртылыу, тишелеү, йыртылып (тишелеп) сығыу; **мешо́к прорва́лся** тоҡ йыртылды **2.** йырылыу, йырылып китеү; **река́ прорвала́сь в пусты́ню** йылға сүлгә йырылды **3.** (*лопнуть*) һытылыу, тишелеү, бүҫелеү; **нары́в прорва́лся** шешек һытылды **4.** (*проложить себе путь*) йырып сығыу, үҙеңә юл ярыу; **прорва́ться че́рез фронт** фронт аша йырып сығыу **5.** *перен.* (*внезапно и бурно обнаружиться — о чувстве*) бәреп (ҡалҡып килеп) сығыу, ҡапыл беленеү

**ПРОРЕДИ́ТЬ** *сов. что* һирәгәйтеү, һирәкләтеп сығыу; **прореди́ть густы́е всхо́ды овоще́й** йәшелсәләрҙең ҡуйы сығымдарын һирәгәйтеү

**ПРОРЕ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **прореди́ть**

**ПРОРЕ́З** *м* **1.** *см.* **проре́зать** — **прореза́ть** 1—3; **2.** (*прорезанное место*) уйым, тишек

**ПРОРЕ́ЗАТЬ** *сов. что* **1.** уйып алыу, ҡырҡып яһау; **проре́зать карма́н** ҡырҡып кеҫә яһау **2.** (*прорубить*) уйыу; **проре́зать дверь** ишек

уйыу **3.** ҡырҡып тишеү (сығарыу); **прорéзать скáтерть** ашъяулыҡты ҡырҡып тишеү **4.** киҫеп (телеп) үтеү, ярыу; **желéзная дорóга прорéзала степь** тимер юл даланы киҫеп үткән; **мóлния прорéзала нéбо** йәшен күк йөҙөн телеп үтте

**ПРОРЕЗÁТЬ** *несов. см.* **прорéзать**

**ПРОРÉЗАТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о зубах*) сығыу, теш сығыу; **у негó прорéзались перéдние зýбы** уның алғы тештәре сыҡҡан **2.** (*о морщинах*) һырланыу, барлыҡҡа килеү

**ПРОРЕЗÁТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прорéзаться 2.** *страд. от* **прорезáть**

**ПРОРЕЗИ́НЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **прорези́нить 2.** *прил.* резиналы; **прорези́ненная ткань** резиналы туҡыма

**ПРОРЕЗИ́НИВАТЬ** *несов. см.* **прорези́нить**

**ПРОРЕЗИ́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прорези́ниться 2.** *страд. от* **прорези́нивать**

**ПРОРЕЗИ́НИТЬ** *сов. что* резиналау, резина һеңдереү; **прорези́нить ткань** туҡыманы резиналау

**ПРОРЕЗИ́НИТЬСЯ** *сов.* резиналаныу, резина һеңеү

**ПРОРЕЗНÓЙ,** -ая, -ое уймалы, уйып яһалған; **прорезнóй кармáн** уйып яһалған кеҫә

**ПРОРÉЗЫВАТЬ** *несов. см.* **прорéзать**

**ПРОРÉЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прорéзаться 2.** *страд. от* **прорéзывать**

**ПРÓРЕЗЬ** *ж* **1.** (*сквозное отверстие*) үтәләй тишек, йырыҡ, уйым **2.** (*сквозная резьба*) һыр **3.** *спец.* (*в прицеле оружия*) уйым

**ПРОРÉКТОР** *м* проректор (*ректор урынбаҫары*); **прорéктор университéта** университет проректоры

**ПРОРÉХА** *ж*; *разг.* **1.** тишек, йыртыҡ; **кармáн с прорéхой** тишек кеҫә **2.** *перен.* етешһеҙлек, кәмселек; **прорéхи в хозя́йстве** хужалыҡтағы етешһеҙлектәр

**ПРОРЕЦЕНЗИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **рецензи́ровать**; **прорецензи́ровать кни́гу** китапҡа рецензия яҙыу

**ПРОРЖÁВЕТЬ** и **ПРОРЖАВÉТЬ** *сов.* тутығыу, тутығып бөтөү (тишелеү); **кры́ша проржáвела** түбә тутығып тишелгән

**ПРОРИЦÁТЕЛЬ** *м* и **ПРОРИЦÁТЕЛЬНИЦА** *ж* күрәҙәлек итеүсе, алдан күрә белеүсе

**ПРОРИЦÁТЬ** *несов. что* күрәҙәлек итеү, алдан әйтеү

**ПРОРÓК** *м* **1.** *рел.* пәйғәмбәр; **сказáние о прорóках** пәйғәмбәрҙәр тураһында хикәйәт **2.** (*предсказатель будущего*) әүлиә, алдан күрә белеүсе

**ПРОХВАТИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *разг.* (*пронизать — о холоде, сырости*) үтә һуғыу, елеккә үтеү **2.** (*продуть, вызвать простуду*) һыуыҡ тейеү, һалҡын үтеү **3.** *прост.* эләктереү, ҡаты тәнҡитләү; **прохвати́ть в газе́те** гәзиттә ҡаты тәнҡитләү

**ПРОХВА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **прохвати́ть**

**ПРОХВОРА́ТЬ** *сов.*; *разг.* ауырып ятыу (йөрөү), ауырып алыу

**ПРОХВО́СТ** *м*; *разг., бран.* ҡәбәхәт, әшәке кеше

**ПРОХЛА́ДА** *ж* һалҡынса һауа, еләҫлек; **вече́рняя прохла́да** киске еләҫлек

**ПРОХЛА́ДЕЦ** и **ПРОХЛА́ДЦА: с прохладце́м (прохла́дцей)** *разг.*: 1) һүлпән генә, ашыҡмай; 2) күңел бирмәй (*ниҙер башҡарыу*)

**ПРОХЛАДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һалҡынайтҡыс, һалҡынлыҡ бирә торған; **прохлади́тельные напи́тки** һалҡынайтҡыс эсемлектәр **2.** *в знач. сущ.* **прохлади́тельное** *с* һалҡын эсемлек

**ПРОХЛАДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һыуыныу, еләҫләнеү; **вы́йти прохлади́ться** еләҫләнергә сығыу

**ПРОХЛА́ДНО 1.** *нареч.* һалҡын; **встре́тить прохла́дно** һалҡын ҡаршы алыу **2.** *в знач. сказ., безл.* һалҡынса, еләҫ; **сего́дня прохла́дно** бөгөн һалҡынса **3.** *кому в знач. сказ., безл.* һалҡын, һыуыҡ; **мне прохла́дно** миңә һыуыҡ

**ПРОХЛА́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һалҡынса, еләҫ; **прохла́дный ве́чер** еләҫ кис **2.** *перен.* битараф, һалҡын; **прохла́дные отноше́ния** һалҡын мөнәсәбәттәр

**ПРОХЛАЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прохлади́ться 2.** *разг.* әкрен ҡыланыу, бызмырлау, яй маташыу **3.** *разг.* (*жить беззаботно*) ҡайғыһыҙ (мәшәҡәтһеҙ) йәшәп ятыу

**ПРОХЛО́ПАТЬ** *сов. что*; *прост.* ысҡындырыу, ауыҙ асып ҡалыу

**ПРОХО́Д** *м* **1.** *см.* **проходи́ть** I; **2.** (*место, где можно пройти*) үтеү юлы, үткәл; **го́рный прохо́д** тау үткәле ♦ **за́дний прохо́д** *анат.* арт юл; **прохо́да (прохо́ду) не дава́ть** *кому* тынғы

бирмәү, маҙаһыҙлау; **прохо́да (прохо́ду) нет** *от кого-чего* тынғы юҡ, ҡотолор әмәл юҡ

**ПРОХОДИ́МЕЦ** *м*; *разг.* әшәке (йүнһеҙ) кеше

**ПРОХОДИ́МОСТЬ** *ж* **1.** үтерлек, йөрөрлөк булыу; **проходи́мость боло́та** һаҙлыҡтың үтерлек булыуы **2.** *мед.* үткәреү һәләте, үткәреүсәнлек; **проходи́мость кишо́к** эсәктәрҙең үткәреүсәнлеге **3.** *спец.* үтә алыу, үтеүсәнлекле; **автомоби́ль повы́шенной проходи́мости** бөтә ерҙән дә үтә алыуға әйә автомобиль

**ПРОХОДИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **проходи́ть** I; **2.** *прил.* үтерлек, үтә алырлыҡ, үтмәле; **проходи́мые места́ тайги́** тайганың үтерлек урындары

**ПРОХОДИ́ТЬ I** *несов. см.* **пройти́**

**ПРОХОДИ́ТЬ II** *сов.* **1.** йөрөү, йөрөп үткәреү; **проходи́ть до обе́да по у́лице** төшкә тиклем урамда йөрөү **2.** (*о механизмах*) йөрөү, эшләп тороу; **часы́ проходи́ли год** сәғәт бер йыл йөрөнө

**ПРОХО́ДКА** *ж*; *горн.* ҡаҙыу, ҡаҙып үтеү; **прохо́дка ша́хты** шахта ҡаҙыу

**ПРОХО́ДНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*служащий для прохода*) аша үтә торған, үтә йөрөмәле; **проходно́й двор** үтә йөрөмәле ишек алды **2.** *в знач. сущ.* **проходна́я** *ж* проходной, үткәргес (*заводта, шахтала һ.б.*)

**ПРОХО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *горн.* ҡаҙыу ...ы, ҡаҙып үтеүселәр ...ы; **прохо́дческая брига́да** ҡаҙып үтеүселәр бригадаһы

**ПРОХО́ДЧИК** *м*; *горн.* ҡаҙып үтеүсе, проходчик

**ПРОХОЖДЕ́НИЕ** *с см.* **проходи́ть** I 1; **прохожде́ние сеа́нса** сеанс барыуы; **прохожде́ние смо́тра** смотр барышы

**ПРОХО́ЖИЙ,** -ая, -ее **1.** үтеп барыусы, үткенсе; **прохо́жий челове́к** үтеп барыусы кеше **2.** *в знач. сущ.* **прохо́жий** *м* и **прохо́жая** *ж* үткенсе, юлаусы

**ПРОХРИПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*издать хрип*) хырылдау, ғыжылдау **2.** ғыжылдаҡ (ҡарлыҡҡан) тауыш менән әйтеү (йырлау)

**ПРОЦВЕСТИ́** *сов.* **1.** *уст.* (*прийти в состояние подъёма*) күтәрелеү, үҫеү, алға барыу (китеү) **2.** сәскә атыу, сәскәлә ултырыу (булыу) (*күпмелер ваҡыт*); **ро́зы процвели́ це́лый ме́сяц** розалар бер ай буйы сәскәлә ултырҙы

**ПРОЦВЕТА́НИЕ** *с см.* **процвета́ть** 2; **процвета́ние нау́ки** фәндең сәскә атыуы

**ПРОЦВЕТА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **процвести́** 1; **2.** (*успешно развиваться*) сәскә атыу, гөрләү

**ПРОЦЕДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* һөҙөү, һарҡытыу; **процеди́ть молоко́** һөт һөҙөү **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* (теш араһынан) һөҙөп сығарыу

**ПРОЦЕДУ́РА** *ж* **1.** процедура, тәртип; **процеду́ра голосова́ния** һайлау тәртибе **2.** *мед.* процедура; **лече́бные процеду́ры** дауалау процедуралары

**ПРОЦЕДУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** процедура ...ы, тәртип ...ы; **процеду́рный вопро́с** процедура мәсьәләһе **2.** процедура(лар) ...ы; **процеду́рный кабине́т** процедуралар бүлмәһе

**ПРОЦЕ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **процеди́ть**

**ПРОЦЕ́НТ** *м*; *в разн. знач.* процент; **вы́полнить зака́з на сто проце́нтов** заказды йөҙ процентҡа үтәү; **вкла́ды даю́т две́сти проце́нтов дохо́да** һалымдар ике йөҙ процент килем бирә ♦ **на (все) сто проце́нтов** тулыһынса, тотош

**ПРОЦЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*выраженный в процентах*) процентлы, процент; **проце́нтная но́рма** процентлы норма; **проце́нтная надба́вка** процентлы өҫтәмә **2.** (*приносящий проценты*) процентлы, проценттар менән, процент бирә (өҫтәй) торған; **проце́нтные бума́ги** процент өҫтәй торған ҡағыҙҙар

**ПРОЦЕ́СС** *м* **1.** *в разн. знач.* барыш, процесс; **проце́сс разви́тия** үҫеш процесы; **произво́дственный проце́сс** етештереү процесы; **уголо́вный проце́сс** *юр.* енәйәт эшенең барышы; **суде́бный проце́сс** *юр.* суд процесы; **уча́ствовать в проце́ссе** *юр.* процеста ҡатнашыу **2.** процесс (*ауырыуҙың көсәйә барыуы*); **воспали́тельный проце́сс** шешеү процесы

**ПРОЦЕ́ССИЯ** *ж* процессия (*күмәк кеше ҡатнашлығындағы йөрөш*)

**ПРОЦЕССУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *юр.* процессуаль; **процессуа́льный пери́од** процессуаль дәүер

**ПРОЦИТИ́РОВАТЬ** *сов.* *кого-что* өҙөмтә килтереү, өҙөк алыу; **процити́ровать кла́ссика** классиктан өҙөк алыу

**ПРО́ЧЕРК** *м* һыҙыҡ (*булмаған нәмә урынындағы*); **сде́лать про́черк** һыҙыҡ ҡуйып китеү

**ПРОЧЁРКИВАТЬ** *несов. см.* **прочеркну́ть**

**ПРОЧЕРКНУ́ТЬ** *сов.* *что* буйҙан-буйға һыҙыу, һыҙыҡ үткәреү, һыҙып ташлау

**ПРОЧЕРТИ́ТЬ** *сов.* *что*; *в разн. знач.* һыҙыу, һыҙып сығыу, һыҙыҡ үткәреү, буйҙан-буйға һыҙыу; **прочерти́ть криву́ю** кәкере һыҙыҡ һыҙыу

**ПРОЧЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **прочерти́ть**

**ПРОЧЕСА́ТЬ** *сов.* *что* **1.** тарау, тетеү, тәрәшләү; **прочеса́ть шерсть** йөн тарау **2.** *перен.*, *разг.* ентекләп ҡарау, һөҙөп (ентекләп) ҡарап сығыу; **прочеса́ть лес** урманды ентекләп ҡарап сығыу

**ПРОЧЕ́СТЬ** *сов. см.* **прочита́ть** 1—4

**ПРОЧЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **прочеса́ть**

**ПРО́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** башҡа, бүтән, ҡалған; **про́чие дела́** башҡа эштәр **2.** *в знач. сущ.* **про́чее** *с* башҡаһы, бүтәне, ҡалғаны **3.** *в знач. сущ.* **про́чие** *мн.* башҡалар, бүтәндәр, ҡалғандар (*кешеләр тураһында*) ♦ **и про́чее (и пр.)** һәм башҡа (һ.б.)

**ПРОЧИ́СТИТЬ** *сов.* *что* **1.** таҙартыу, таҙартып сығыу; **прочи́стить трубу́** мөрйә таҙартыу **2.** (*расчищая путь, сделать что-л. проходи-*

*мым*) ҡырҡып юл һалыу, ҡырҡып һирәгәйтеү; **прочи́стить доро́гу че́рез зе́лень** үҫентеләрҙе ҡырҡып юл һалыу

**ПРОЧИ́СТИТЬСЯ** *сов.* (*очиститься от чего-л. засоряющего*) таҙарыу, таҙарыныу

**ПРОЧИТА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* уҡыу, уҡып сығыу; **прочита́ть сло́во** һүҙҙе уҡыу; **прочита́ть по-башки́рски** башҡортса уҡыу **2.** *что*; *перен.* белеү, күреү (*хис-тойғоно, теләкте һ.б.*); **прочита́ть по глаза́м** күҙҙәренән күреү **3.** *что* (*продекламировать*) яттан уҡыу, һөйләү; **прочита́ть наизу́сть стихотворе́ние** шиғырҙы яттан уҡыу **4.** *что* уҡыу, яһау; **прочита́ть нравоуче́ние** өгөт-нәсихәт уҡыу **5.** *что* и *без доп.* уҡыу, уҡып үткәреү (*күпмелер ваҡыт*)

**ПРОЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **прочита́ть** 1—4

**ПРО́ЧИТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* булыр тип иҫәпләү (һанау), шулай һанау (уйлау); **про́чить в директора́** *кого-л. кемделер* директор булыр тип һанау

**ПРОЧИЩА́ТЬ** *несов. см.* **прочи́стить**

**ПРО́ЧНО** *нареч.* ныҡ; **стоя́ть про́чно** ныҡ тороу

**ПРО́ЧНОСТЬ** *ж* ныҡлыҡ; **про́чность тка́ни** туҡыманың ныҡлығы

**ПРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ныҡ; **про́чная ткань** ныҡ туҡыма **2.** *перен.* ныҡлы, ышаныслы, көслө, сыҙамлы; **про́чный хара́ктер** көслө характер **3.** *перен.* ҡаҡшамаҫ, ышаныслы; **про́чный мир** ҡаҡшамаҫ тыныслыҡ; **про́чное положе́ние** ышаныслы хәл

**ПРОЧТЕ́НИЕ** *с см.* **проче́сть**, **прочита́ть** 1—3; **прочте́ние ку́рса ле́кций** лекциялар курсын уҡыу

**ПРОЧУ́ВСТВОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **прочу́вствовать 2.** *прил.* хисле, тәрән тойғоло; **прочу́вствованная речь** тәрән тойғоло телмәр

**ПРОЧУ́ВСТВОВАТЬ** *сов. что* **1.** (*воспринять чувствами что-л.*) тәрән аңлау, йөрәк менән тойоу **2.** (*испытать какое-л. чувство*) кисереү, баштан үткәреү

**ПРОЧЬ** *нареч.* **1.** (*в сторону*) ситкә; **отойти́ прочь** ситкә китеү; **отбро́сить прочь** ситкә алып ташлау **2.** (*долой*) кит, ал, ебәр, ысҡын, юғал; **прочь ру́ки!** ал ҡулыңды! **3.** *в знач. межд.* кит, ысҡын, юғал, шыл; **прочь с мои́х глаз!** күҙемдән юғал! ♦ **не прочь** ҡаршы түгел, риза; **ру́ки прочь** *см.* **рука́**

**ПРОШАГА́ТЬ** *сов.* атлап үтеү, атлау; **прошага́ть де́сять киломе́тров** ун километр атлап үтеү

**ПРОШЕ́ДШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **пройти́ 2.** *прил.* үткән, үтеп киткән; **проше́дшая зима́** үткән ҡыш **3.** *в знач. сущ.* **проше́дшее** *с* үткәндәр, уҙғандар, үткән (уҙған) заман ♦ **проше́дшее вре́мя** *грам.* үткән заман

**ПРОШЕ́НИЕ** *с*; *уст.* **1.** *см.* **проси́ть** 1, 5; **2.** үтенес яҙыуы, ғаризнамә; **пода́ть проше́ние** үтенес яҙыуы биреү

**ПРОШЕПТА́ТЬ** *сов. что* бышылдап (шыбырлап) әйтеү, бышылдау

**ПРОШЕ́СТВИЕ: по проше́ствии** уҙғас, үткәс, үткәндән һуң

**ПРОШИБА́ТЬ** *несов. см.* **прошиби́ть**

**ПРОШИБИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* (*пробить*) бәреп, һуғып тишеү; **прошиби́ть дверь** ишекте һуғып тишеү **2.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* (*пробрать — о холоде и т.п.*) үтә һуғыу, өшөтөү **3.** *перен.* (*с силой проявиться*) бәреп сығыу; **пот проши́б** тир бәреп сыҡты **4.** *кого*; *перен.*, *прост.* (*подействовать на кого-что-л.*) алдырыу, еңеү; **его́ ниче́м не прошибёшь** уны бер нисек тә еңеп булмай ♦ **пу́шкой (из пу́шки) не прошибёшь** *см.* **пу́шка**

**ПРОШИВА́ТЬ** *несов. см.* **проши́ть**

**ПРОШИ́ВКА** *ж* **1.** *см.* **проши́ть** — **прошива́ть** 1, 2; **2.** (*кружево*) селтәр (*күлдәктә һ.б. тегелгән*) **3.** *тех.* (*обработка металла*) бырауլап тишеү **4.** *тех.* (*металлорежущий инструмент*) тишкес

**ПРОШИВНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*прошитый насквозь*) үтәләй тегелгән; **прошивно́й вати́н** үтәләй тегелгән ватин **2.** (*снабжённый прошивками*) селтәрле **3.** *тех.* тишеү ...ы, тишкес ...ы; **прошивно́й пресс** тишеү пресы

**ПРОШИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тегеү, тегеп сығыу; **проши́ть подо́шву** табанды тегеп сығыу **2.** *что* ҡайыу, ҡайып сығыу; **проши́ть воротни́к** яғаны ҡайып сығыу **3.** *что*; *тех.* тишеү **4.** *кого-что*; *разг.* тишкеләү, тишә атыу; **проши́ть сте́ну пу́лями** стенаны пулялар менән тишкеләү

**ПРОШЛОГО́ДНИЙ,** -яя, -ее **1.** былтырғы, үткән йылғы; **прошлого́дняя газе́та** былтырғы гәзит **2.** былтырғы, былтыр булған; **прошлого́дний разгово́р** былтырғы һөйләшеү ♦ **как прошлого́дний снег ну́жен (интересу́ет)** *см.* **снег**

**ПРО́ШЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** үткән, уҙған; **про́шлый год** үткән йыл **2.** (*предыдущий*) бынан алдағы, үткәндәге; **про́шлая встре́ча** бынан алдағы осрашыу **3.** *в знач. сущ.* **про́шлое** *с* үткәндәр, үткәндәгеләр, үткән (элекке) заман; **далёкое про́шлое** күптән үткән заман; **воспомина́ния о про́шлом** үткәндәр тураһында хәтирәләр ♦ **отойти́ в про́шлое** онотолоу, онот булыу (*йола тураһында*)

**ПРОШЛЯ́ПИТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *прост.* ысҡындырыу, һемәйеп (ауыҙ асып) ҡалыу

**ПРОШМЫ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **прошмыгну́ть**

**ПРОШМЫГНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* тиҙ генә үтеп китеү, елт итеп ҡалыу; **прошмыгну́ть в дом** өйгә елт итеп инеп китеү

**ПРОШНУРОВА́ТЬ** *сов. что* шнурлап ҡуйыу, бергә тегеп (бәйләп) ҡуйыу, бау (шнур) үткәреү; **прошнурова́ть тетра́дь** дәфтәрҙе шнурлап ҡуйыу

**ПРОШНУРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **прошнурова́ть**

**ПРОШПАКЛЕВА́ТЬ** *сов. что*; *спец.* тигеҙләп һылау (һылап сығыу), шпаклёвкалап ҡуйыу; **прошпаклева́ть сте́ны** стеналарҙы тигеҙләп һылап сығыу

**ПРОШПАКЛЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **прошпаклева́ть**

**ПРОШТРА́ФИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ғәйепкә ҡалыу, хата эшләү

**ПРОШТУДИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **штуди́ровать**; **проштуди́ровать матема́тику** математиканы ентекләп уҡыу

**ПРОШТУКАТУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **проштукату́рить**

**ПРОШТУКАТУ́РИТЬ** *сов. что* штукатурлау, штукатурлап сығыу

**ПРОЩА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое хушлашыу (һаубуллашыу) ...ы; **проща́льный обе́д** һаубуллашыу мәжлесе; **проща́льный приве́т** хушлашыу сәләме

**ПРОЩА́НИЕ** *с см.* **проща́ться** ♦ **на проща́ние** айырылышҡанда, хушлашҡанда

**ПРОЩА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **прости́ть** **2.** *повел.* **проща́й(те)** хуш бул(ығыҙ), һау бул(ығыҙ)

**ПРОЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прости́ться** **2.** *страд. от* **проща́ть**

**ПРОЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **прости́ть** — **проща́ть** **2.** (*помилование*) ғәфү итеү, кисереү, ярлыҡау; **проси́ть проще́ния** ғәфү үтенеү

**ПРОЩУ́ПАТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡапшап (һәрмәп) ҡарау, ҡапшап табып алыу; **прощу́пать карма́ны** кеҫәләрҙе ҡапшап ҡарау **2.** *кого-что*; *перен.* һынап ҡарау, тикшереп белеү ♦ **прощу́пать по́чву** тикшереп ҡарау, ҡылын тартып ҡарау

**ПРОЩУ́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **прощу́пать**

**ПРОЩУ́ПЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡапшағанда беленеү (тойолоу, һиҙелеү); **о́пухоль прощу́пывается** шеш ҡапшағанда һиҙелә **2.** *страд. от* **прощу́пывать**

**ПРОЭКЗАМЕНОВА́ТЬ** *сов. см.* **экзаменова́ть**; **проэкзаменова́ть студе́нта** студенттан имтихан алыу

**ПРОЭКЗАМЕНОВА́ТЬСЯ** *сов. см.* **экзаменова́ться**

**ПРОЯВИ́ТЕЛЬ** *м*; *фото.* проявитель, сығарғыс

**ПРОЯВИ́ТЬ** *сов. что* **1.** күрһәтеү, белдереү; **прояви́ть геро́изм** ҡаһарманлыҡ күрһәтеү **2.** *фото.* сығарыу; **прояви́ть фотосни́мок** фотоһүрәтте сығарыу ♦ **прояви́ть себя́** үҙеңде күрһәтеү (*яҡшы йәки насар яҡтан*)

**ПРОЯВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** беленеү, һиҙелеү, асылыу; **у него́ прояви́ли́сь спосо́бности к му́зыке** уның музыкаға һәләте асылды **2.** *фото.* сығыу; **сни́мок прояви́лся** һүрәт сыҡты

**ПРОЯВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **прояви́ть**

**ПРОЯВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **прояви́ться** **2.** *страд. от* **проявля́ть**

**ПРОЯ́СНЕТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** асылыу, асыҡланыу, яҡтырыу; **не́бо проя́снело** күк йөҙө асылды **2.** *безл.* (*о наступлении ясной погоды*) аяҙыу, аяҙытыу

**ПРОЯСНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** асыҡланыу, асылыу; **мы́сли проясне́ли** фекерҙәр асыҡланды **2.** йөҙ асылыу (яҡтырыу), асылып (яҡтырып) китеү; **глаза́ проясне́ли** күҙ алды яҡтырып китте

**ПРОЯ́СНИВАТЬ** *несов. см.* **проя́снеть** 2

**ПРОЯ́СНИТЬ** *сов. безл.*; *прост. см.* **проя́снеть** 2

**ПРОЯСНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** асыҡлау, асыҡ итеү; **проясни́ть ко́нтуры на рису́нке** рәсемдең контурын асыҡ итеү **2.** асыҡлау, белеү; **проясни́ть обстано́вку** хәлде асыҡлау **3.** (*о сознании, рассудке*) асыҡлау, аныҡлау, яңы асылыу

**ПРОЯ́СНИТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **проя́снеть**

**ПРОЯСНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** асылыу, асыҡланыу; **не́бо проясни́лось** күк йөҙө асылды **2.** асыҡланыу; **положе́ние проясни́лось** хәл асыҡланды **3.** (*о сознании*) асылыу

**ПРОЯСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **проясни́ть**

**ПРОЯСНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **проясни́ться** **2.** *страд. от* **проясня́ть**

**ПРУД** *м* быуа; **прото́чный пруд** аҡма быуа

**ПРУДИ́ТЬ** *сов. что* быуыу; **пруди́ть ре́ку** йылғаны быуыу ♦ **хоть пруд пруди́** быуа быуырлыҡ, бик күп

**ПРУДОВО́Й,** -ая, -ое быуа ...ы; **прудова́я ры́ба** быуа балығы

**ПРУЖИ́НА** *ж* **1.** пружина, сиртмә; **часова́я пружи́на** сәғәт пружинаһы **2.** *чего*, *какая*; *перен.* этәргес көс; **пружи́на о́бщества** йәмғиәттең этәргес көсө

**ПРУЖИ́НИСТЫЙ,** -ая, -ое һығылмалы; **пружи́нистое уди́лище** һығылмалы ҡармаҡ һабы

**ПРУЖИ́НИТЬ** *несов.* һығылыу, һығылмалы булыу (*пружина һымаҡ*); **рессо́ры хорошо́ пружи́нят** рессорҙар яҡшы һығыла

**ПРУЖИ́ННЫЙ,** -ая, -ое пружиналы, сиртмәле; **пружи́нный матра́с** пружиналы матрас

**ПРУСА́К** *м* ҡыҙыл тараҡан

**ПРУССАКИ́** *мн.* пруссактар (*Пруссия ерендә йәшәүсе немецтар*) // *ед.* **прусса́к** *м* и **прусса́чка** *ж* пруссак

**ПРУТ** *м* **1.** сыбыҡ; **и́вовый прут** тал сыбығы **2.** (*металлический стержень*) сым, тимер сыбыҡ; **то́нкий прут** нәҙек сым

**ПРУТЯНО́Й,** -ая, -ое сыбыҡ, тал сыбыҡтан үрелгән; **прутяна́я корзи́на** талсыбыҡтан үрелгән кәрзин

**ПРЫГ** *межд. в знач. сказ.*; *разг.* һикереү, һикереп менеү (төшөү һ.б.); **он прыг в во́ду** ул һыуға һикерҙе лә төштө

**ПРЫ́ГАЛКА** *ж*; *разг.* һикергес (*һикереп уйнай торған бау*)

**ПРЫ́ГАТЬ** *несов.* **1.** һикереү, ырғыу; **пры́гать че́рез барье́р** барьер аша һикереү; **пры́гать в во́ду** һыуға һикереү **2.** *перен.*, *разг.* ҡырҡа үҙгәреү, һикереү; (*о сердце*) ныҡ ҡағыу

(*йөрәккә ҡарата*); **давле́ние пры́гает** баҫым ҡырҡа үҙгәрә; **се́рдце пры́гает** йөрәк нык ҡаға

**ПРЫ́ГНУТЬ** *сов. см.* **пры́гать**

**ПРЫГУ́Н** *м* и **ПРЫГУ́НЬЯ** *ж* **1.** *спорт.* һикереүсе; **соревнова́ния прыгуно́в** һикереүселәр ярышы **2.** *разг.* бик теремек (тиктормаҫ, йылғыр, йор, хәрәкәтсән) кеше

**ПРЫЖО́К** *м* һикереш, һикереү; **прыжо́к с парашю́том** парашют менән һикереү; **соревнова́ния по прыжка́м** һикереү буйынса ярыш

**ПРЫ́СКАТЬ** *несов.* **1.** *в кого-что, на кого-что* бөркөү, бөркөп ебәреү, һибеү; **пры́скать во́ду на цветы́** сәскәләргә һыу бөркөү **2.** *см.* **пры́снуть** 3

**ПРЫ́СКАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** бөркөү (һибеү), һөртөнөү; **пры́скаться духа́ми** хушбуй һөртөнөү **2.** *страд. от* **пры́скать**

**ПРЫ́СНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *см.* **пры́скать** 1; **2.** бөркөлөү, бөркөлөп сығыу, сәптереп ағыу; **кровь пры́снула из ра́ны** яранан ҡан сәптереп аҡты **3.** (*разразиться смехом*) пырхылдап (пырх итеп) көлөп ебәреү; **пры́снуть неожи́данно** көтмәгәндә пырхылдап көлөп ебәреү

**ПРЫ́ТКИЙ,** -ая, -ое *разг.* етеҙ, өлгөр, сос; **пры́ткий ма́льчик** етеҙ малай

**ПРЫ́ТКОСТЬ** *ж*; *разг.* етеҙлек, өлгөрлөк, сослоҡ; **отлича́ться пры́ткостью** өлгөрлөк менән айырылып тороу

**ПРЫТЬ** *ж*; *разг.* етеҙлек, йылғырлыҡ, теремеклек; **обнару́жить большу́ю прыть** *в чём-л.* йылғырлыҡ күрһәтеү ♦ **во всю прыть** йән-фарманға, бар (йән) көскә, бөтә көс менән

**ПРЫЩ** *м* һытҡы

**ПРЫЩА́ВЫЙ,** -ая, -ое һытҡылы; **прыща́вое лицо́** һытҡылы бит

**ПРЮНЕ́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое прюнель, прюнелдән тегелгән (эшләнгән); **прюне́левые ту́фли** прюнель туфлиҙар

**ПРЮНЕ́ЛЬ** *ж* прюнель (*аяҡ кейеменең өҫтөн тегеүгә, мебель көпләү өсөн ҡулланылған туҡыма*)

**ПРЯ́ДАТЬ: пря́дать уша́ми** ҡолаҡты ҡайсылау (торғоҙоу) (*ат һ.б. хайуандарға ҡарата*)

**ПРЯДЕ́НИЕ** *с см.* **пря́сть** I; **пряде́ние ше́рсти** йөн иләү

**ПРЯ́ДЕНЫЙ,** -ая, -ое иләнгән; **пря́деная шерсть** иләнгән йөн

**ПРЯДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое (еп) иләү ...ы; **пряди́льная маши́на** еп иләү машинаһы

**ПРЯДИ́ЛЬНЯ** *ж*; *уст.* (еп) иләү фабрикаһы (оҫтаханаһы)

**ПРЯДИ́ЛЬЩИК** *м* и **ПРЯДИ́ЛЬЩИЦА** *ж* (еп) иләүсе

**ПРЯДЬ** *ж* тотам, өлтөк, шәлкем, усма; **прядь воло́с** сәс өлтөгө

**ПРЯ́ЖА** *ж* еп, иләнгән еп; **льняна́я пря́жа** иләнгән киндер еп; **прясть пря́жу** еп иләү

**ПРЯ́ЖКА** *ж* таралғы, элмәк, ҡаптырма, айыл; **сере́бряная пря́жка** көмөш таралғы

**ПРЯ́ЛКА** *ж* иләүес (*еп иләү машинаһы*)

**ПРЯМИЗНА́** *ж* төҙлөк; **прямизна́ ли́нии** һыҙыҡтың төҙлөгө

**ПРЯМИКО́М** *нареч.* **1.** *разг.* тураға, туранан-тураға, түтә; **пройти́ прямико́м** тураға үтеү **2.** (*без утайки*) тура, туранан-тура

**ПРЯМИ́ТЬ** *несов. что*; *разг.* турайтыу, төҙәйтеү; **прями́ть гвоздь** сөй турайтыу

**ПРЯ́МО** *нареч.* **1.** тура, туп-тура, тураға; **идти́ пря́мо** тура барыу **2.** (*без наклона*) тура, төҙ; **держа́ться пря́мо** (кәүҙәне) төҙ тотоу; **сиде́ть пря́мо** тура ултырыу **3.** (*немедленно, непосредственно*) туп-тура, туранан-тура; **приступи́ть пря́мо к де́лу** туранан-тура эшкә тотоноу; **напра́виться пря́мо к дру́гу** дуҫҡа туп-тура китеү **4.** (*откровенно*) туранан-тура, асыҡтан-асыҡ; **говори́ть пря́мо** туранан-тура һөйләү **5.** *в знач. усил. част.*; *разг.* бөтөнләй, ысындан да, ысынында ла, ысынлап та; **пря́мо сил нет** бөтөнләй хәл юҡ; **он пря́мо молоде́ц** ул ысындан да бик шәп

**ПРЯМОДУ́ШИЕ** *с* эскерһеҙлек, асыҡ күңеллелек, хәйләһеҙлек; **пре́лесть прямоду́шия** эскерһеҙлектең матурлығы

**ПРЯМОДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое эскерһеҙ, асыҡ күңелле, хәйләһеҙ; **прямоду́шный челове́к** асыҡ күңелле кеше

**ПРЯМО́Й,** -ая, -ое **1.** тура, төҙ; **пряма́я ли́ния** тура һыҙыҡ; **пряма́я доро́га** тура юл; **прямо́й стан** төҙ кәүҙә **2.** (*непосредственный*) туранан-тура, туп-тура; **прямо́е сообще́ние** туранан-тура бәйләнеш; **прямы́е вы́боры** туранан-тура һайлауҙар; **прямы́е указа́ния** туранан-тура (бирелгән) күрһәтмәләр; **прямо́й насле́дник** туранан-тура вариҫ **3.** асыҡ, тура һүҙле; **прямо́й челове́к** тура һүҙле кеше; **прямо́й взгляд** асыҡ ҡараш **4.** (*явный*) асыҡтан-асыҡ; **прямо́й обма́н** асыҡтан-асыҡ алдау **5.** (*очевидный*) һис шикһеҙ, ысын (мәғәнәһендә); **пряма́я по́льза** һис шикһеҙ файҙа **6.** (*буквальный*) тура; **прямо́е значе́ние сло́ва** һүҙҙең тура мәғәнәһе **7.** *в знач. сущ.* **пряма́я** *ж*; *мат. см.* **пряма́я ли́ния**; **провести́ пряму́ю** тура һыҙыҡ үткәреү **8.** *мат.* тура; **пряма́я пропорциона́льность** тура пропорционаллек ♦ **пряма́я кишка́** *анат.* йыуан эсәк; **пряма́я ли́ния** *мат.* тура һыҙыҡ; **пряма́я речь** *грам.* тура телмәр; **прямо́й во́рот** ултыртма яға; **прямо́й у́гол** тура мөйөш; **прямо́е дополне́ние** *грам.* тура тултырыусы; **прямы́е нало́ги** *фин.* тура һалымдар

**ПРЯМОЛИНЕ́ЙНОСТЬ** *ж* **1.** туралыҡ, төҙлөк; **прямолине́йность сти́ля** стилдең туралығы **2.** туралыҡ, тура һүҙлелек; **прямолине́йность хара́ктера** холоҡтоң туралығы; **показа́ть свою́ прямолине́йность** үҙеңдең тура һүҙлелегеңде күрһәтеү

**ПРЯМОЛИНЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тура, төҙ; **прямолине́йная у́лица** төҙ урам **2.** тура, тура

һүҙле, хәйләһеҙ; **прямолине́йный челове́к** тура һүҙле кеше

**ПРЯМОТА́** *ж* туралыҡ, тура һүҙлелек, хәйләһеҙлек; **прямота́ отве́та** яуаптың туралығы; **прямота́ хара́ктера** холоҡтоң туралығы

**ПРЯ́МО-ТАКИ** *нареч.*; *разг. см.* **пря́мо** 5

**ПРЯМОУГО́ЛЬНИК** *м* тура дүртмөйөш

**ПРЯМОУГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тура мөйөшлө; **прямоуго́льный треуго́льник** тура мөйөшлө өсмөйөш

**ПРЯ́НИК** *м* перәник; **медо́вый пря́ник** баллы перәник

**ПРЯ́НИЧНЫЙ,** -ая, -ое перәник, перәник (бешереү) ...ы; **пря́ничный петушо́к** перәник әтәс; **пря́ничный цех** перәник цехы

**ПРЯ́НОСТЬ** *ж* тәмләткес (*борос, ҡәнәфер, керән һ.б.*)

**ПРЯ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** үткер, ҡырҡыу тәмле, хуш еҫле; **пря́ный за́пах** үткер еҫ; **пря́ные блю́да** ҡырҡыу тәмле аштар **2.** *перен.* үткер, киҫкен; **пря́ные ре́чи** үткер һүҙҙәр

**ПРЯ́СЛО** *с* һайғау, ҡолға; **и́згородь из пря́сел** һайғау кәртә

**ПРЯСТЬ I** *несов. что* и *без доп.* (еп) иләү; **прясть шерсть** йөн иләү

**ПРЯСТЬ II: прясть уша́ми** *см.* **пря́дать уша́ми**

**ПРЯ́СТЬСЯ** *несов. страд. от* **прясть** I

**ПРЯ́ТАТЬ** *несов. кого-что*; *прям., перен.* йәшереү, йыйып ҡуйыу; **пря́тать ключи́** асҡыстарҙы йәшереү; **пря́тать чу́вства** тойғоларҙы йәшереү

**ПРЯ́ТАТЬСЯ** *несов.* **1.** *в разн. знач.* йәшенеү, йәшеренеү, ҡасыу, боҫоу, ышыҡланыу; **пря́таться в лесу́** урманда йәшенеү; **пря́таться от дождя́** ямғырҙан ҡасыу; **со́лнце пря́чется за горо́й** ҡояш тау артына ышыҡлана **2.** *перен., разг.* ҡасып йөрөү, күренмәҫкә тырышыу; **пря́таться от знако́мых** таныштарҙан ҡасып йөрөү **3.** *страд. от* **пря́тать**

**ПРЯ́ТКИ** *только мн.* йәшенмәк (*балалар уйыны*) ♦ **игра́ть в пря́тки**: 1) йәшенмәк уйнау; 2) *перен.* йәшерен эш итеү, аҫтыртын эш алып барыу

**ПРЯ́ХА** *ж* (еп) иләүсе

**ПСАЛО́М** *м*; *рел.* доға, псалом (*Псалтырҙың өлөшө*)

**ПСАЛО́МЩИК** *м* псаломсы (*сиркәүҙәге иң кесе хеҙмәткәр*)

**ПСАЛТЫ́РЬ** *ж* и *разг.* **ПСАЛТЫ́РЬ** *м* Псалтырь, Зәбур (*Библияның бер өлөшө*)

**ПСА́РНЯ** *ж* эттәр ояһы

**ПСАРЬ** *м* һунар эттәрен ҡараусы

**ПСЕВДО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ялған", "уйҙырма", "буш" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **псевдонау́ка** уйҙырма фән

**ПСЕВДОНИ́М** *м* псевдоним (*яҙыусының, рәссамдың һ.б. үҙенә алған икенсе исеме*)

**ПСИ́НА** *ж* **1.** *разг.* (*собачье мясо*) эт ите **2.** *разг.* (*запах собаки*) эт еҫе **3.** *прост.* (*пёс*) эт

**ПСИ́НЫЙ,** -ая, -ое *разг.* эт ...ы; **пси́ный за́пах** эт еҫе

**ПСИХ** *м*; *прост.* ҡыҙма, ҡыҙыу ҡанлы кеше

**ПСИХАСТЕ́НИК** *м* психастеник (*психастения менән ауырыусы*)

**ПСИХАСТЕНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое психастения ...ы; **психастени́ческие симпто́мы** психастения билдәләре

**ПСИХАСТЕНИ́Я** *ж*; *мед.* психастения (*ҡурҡыу, үҙ-үҙенә ышанмау, бәйләнсек уйҙар, шикләнеү һ.б. ғибәрәт булған психик ауырыу*)

**ПСИХИА́ТР** *м* психиатр (*психиатрия белгесе*)

**ПСИХИАТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое психиатрик, психиатрия ...ы; **психиатри́ческая больни́ца** психиатрия хәстәханаһы

**ПСИХИАТРИ́Я** *ж*; *мед.* психиатрия (*медицинаның психик ауырыуҙарҙы, уларҙы дауалау ысулдарын өйрәнә торған бүлеге*)

**ПСИ́ХИКА** *ж* психика, рух; **здоро́вая пси́хика** сәләмәт рух

**ПСИХИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое психик, психика ...ы; **психи́ческие осо́бенности** психик үҙенсәлектәр ♦ **психи́ческая ата́ка** психик атака (*ҡаршы яҡты ҡурҡытыу, алышҡа ихтыярын баҫыу өсөн яһалған асыҡ һөжүм*); **психи́ческие боле́зни** психик ауырыуҙар

**ПСИХОАНА́ЛИЗ** *м* психоанализ (*психологик процестарҙы өйрәнеүгә ҡоролған ысул*)

**ПСИХОВА́ТЬ** *несов.*; *прост.* ҡыҙышыу, ҡыҙып китеү, үҙеңде тота алмау

**ПСИХО́З** *м*; *мед.* психоз (*психик ауырыу*)

**ПСИХОЛИНГВИ́СТИКА** *ж* психолингвистика (*телмәр барлыҡҡа килеүен, уны ҡабул итеү законлыҡтарын өйрәнеүсе фән*)

**ПСИХО́ЛОГ** *м* психолог (**1.** *психология белгесе* **2.** *кеше психологияһын тәрән тойоусы*)

**ПСИХОЛОГИ́ЗМ** *м* психологизм (**1.** *социологиялағы идеалистик йүнәлеш* **2.** *кешеләрҙең рухи кисерештәрен тәрән белеү һәм нескә һүрәтләү*); **психологи́зм в литерату́ре** әҙәбиәттә психологизм

**ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое психологик, психология ...ы; **психологи́ческий ана́лиз** психологик анализ; **психологи́ческий рома́н** психологик роман

**ПСИХОЛО́ГИЯ** *ж*; *в разн. знач.* психология; **о́трасли психоло́гии** психологияның тармаҡтары; **психоло́гия ребёнка** бала психологияһы; **психоло́гия тво́рчества** ижад психологияһы

**ПСИХОПА́Т** *м* и **ПСИХОПА́ТКА** *ж* психопат (*психопатия менән сирләүсе*)

**ПСИХОПА́ТИЯ** *ж* психопатия (*рухи һәләттең, психиканың ауырыу булыуы*)

**ПСИХОПАТО́ЛОГ** *м* психопатолог (*психопатология белгесе*)

**ПСИХОПАТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое психопатологик; **психопатологи́ческое иссле́дование** психопатологик тикшеренеү

**ПСИХОПАТОЛО́ГИЯ** *ж* психопатология (*психик эшмәкәрлек боҙолоуының дөйөм мәсьәләләрен өйрәнә торған фән*)

**ПСИХОТЕРАПИ́Я** *ж* психотерапия (*психик йоғонто менән дауалау саралары*)

**ПСИХРО́МЕТР** *м* психрометр (*һауа дымлылығын билдәләй торған прибор*)

**ПСО́ВЫЙ,** -ая, -ое эт ...ы; **псо́вая охо́та** эт һунары

**ПТА́ХА** *ж*; *разг.* ҡошсоҡ

**ПТЕНЕ́Ц** *м* ҡош балаһы, бала ҡош

**ПТИ́ЦА** *ж* **1.** ҡош; **дома́шние пти́цы** йорт ҡоштары; **пе́вчие пти́цы** һайрар ҡоштар; **хи́щные пти́цы** йыртҡыс ҡоштар **2.** *собир.* ҡош-ҡорт, ҡоштар; **о́зеро киши́т пти́цей** күл ҡош-ҡорт менән тулы **3.** *разг.*, *ирон.* кеше, әллә кем; **ва́жная пти́ца** ҙур кеше; **не велика́ пти́ца** әллә кем түгел ♦ **во́льная пти́ца** *см.* **во́льный**; **обстре́ляная (стре́ляная) пти́ца** күпте күргән кеше; **пти́ца высо́кого полёта** *см.* **полёт**

**ПТИЦЕВО́Д** *м* ҡошсо (*ҡошсолоҡ белгесе*)

**ПТИЦЕВО́ДСТВО** *с* ҡошсолоҡ, ҡош-ҡорт аҫраусылыҡ

**ПТИЦЕВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ҡошсолоҡ ...ы, ҡош аҫраусылыҡ ...ы; **птицево́дческая фе́рма** ҡошсолоҡ фермаһы

**ПТИЦЕЛО́В** *м* ҡош аулаусы (*башлыса һайрар ҡоштарҙы*)

**ПТИЦЕЛО́ВСТВО** *с* ҡош аулаусылыҡ (*һайрар ҡоштарҙы*); **занима́ться птицело́вством** ҡош аулаусылыҡ менән шөғөлләнеү

**ПТИЦЕФА́БРИКА** *ж* ҡошсолоҡ фабрикаһы

**ПТИЦЕФЕ́РМА** *ж* ҡошсолоҡ фермаһы

**ПТИ́ЧИЙ,** -ья, -ье **1.** ҡош ...ы; **пти́чье гнездо́** ҡош ояһы **2.** (*такой, как у птицы*) ҡоштоҡо кеүек, ҡоштоҡона оҡшаған; **пти́чий нос** ҡош танау ♦ **пти́чий база́р** ҡош баҙары; **на пти́чьих права́х (быть, жить и т.п.)** *шутл.* хоҡуҡһыҙ рәүештә (йәшәү), саҡ-саҡ эләгеп тороу; **с (высоты́) пти́чьего полёта** *см.* **полёт**; **(то́лько) пти́чьего молока́ недостаёт (не хвата́ет)** күгәрсен һөтө генә юҡ (*байлыҡ, муллыҡҡа ҡарата*)

**ПТИ́ЧКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **пти́ца** 1; **2.** *разг.* (*пометка*) билдә, бәләкәй генә билдә

**ПТИ́ЧНИК** *м* **1.** кетәк, ҡош аҙбары **2.** ҡош ҡараусы (*эшсе*)

**ПТИ́ЧНИЦА** *ж* ҡош ҡараусы

**ПУА́НТЫ** *мн.* (*ед.* **пуа́нт** *м*) пуант(тар) (*балет туфлийының табаны*)

**ПУ́БЛИКА** *ж собир.* **1.** тамашасылар, публика; **пу́блика запо́лнила зал** тамашасылар залға тулды **2.** *разг. шутл.* халыҡ, кешеләр; **великоле́пная пу́блика** бына тигән халыҡ

**ПУБЛИКА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **публикова́ть**; **публика́ция архи́вных докуме́нтов** архив документтарын баҫтырып сығарыу **2.** баҫылып сыҡҡан әҫәрҙәр (хеҙмәттәр); **журна́льная публика́ция** журналда баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәр

**ПУБЛИКОВА́ТЬ** *несов. что* баҫтырыу, баҫтырып сығарыу (белдереү); **публикова́ть зако́ны** закондарҙы баҫтырып сығарыу; **публикова́ть статьи́ в газе́те** гәзиттә мәкәләләр баҫтырыу

**ПУБЛИКОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **публикова́ть**

**ПУБЛИЦИ́СТ** *м* публицист (*ижтимағи-сәйәси темаларҙы яҡтыртҡан яҙыусы*)

**ПУБЛИЦИ́СТИКА** *ж* публицистика (**1.** *әҙәби жанр* **2.** *ижтимағи-сәйәси мәсьәләләр буйынса яҙылған әҙәбиәт*)

**ПУБЛИЦИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое публицистик; **публицисти́ческий жанр** публицистик жанр; **публицисти́ческая де́ятельность** публицистик эшмәкәрлек

**ПУБЛИ́ЧНОСТЬ** *ж* асыҡлыҡ; **публи́чность суде́бного проце́сса** суд процесының асыҡлығы

**ПУБЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** асыҡ, халыҡ алдында; **публи́чная ле́кция** асыҡ лекция; **публи́чное выступле́ние** халыҡ алдындағы сығыш **2.** халыҡ өсөн асыҡ; **публи́чная библиоте́ка** халыҡ өсөн асыҡ китапхана ♦ **публи́чный дом** фәхешхана; **публи́чная же́нщина** фәхишә; **публи́чные торги́** асыҡ алыш-биреш (*аукцион*)

**ПУ́ГАЛО** *с*; *прям.*, *перен.* ҡараҫҡы; **огоро́дное пу́гало** баҡса ҡараҫҡыһы

**ПУ́ГАНЫЙ,** -ая, -ое ҡурҡытылған, өрккән ♦ **пу́ганая воро́на куста́ бои́тся** *см.* **воро́на**

**ПУГА́ТЬ** *несов. кого* ҡурҡытыу, өркөтөү, шөрләтеү; **пуга́ть друг дру́га** бер-берене ҡурҡытыу

**ПУГА́ТЬСЯ** *несов.* ҡурҡыу, өркөү, шөрләү; **пуга́ться темноты́** ҡараңғынан шөрләү

**ПУГА́Ч** *м* пугач (*уйынсыҡ пистолет*)

**ПУГА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **пуга́ть** **2.** *прил.* ҡурҡыныс, ҡурҡытҡыс; **пуга́ющий вид** ҡурҡыныс ҡиәфәт

**ПУГЛИ́ВОСТЬ** *ж* ҡурҡаҡлыҡ, өркәклек; **преодоле́ть пугли́вость** ҡурҡаҡлыҡты еңеү

**ПУГЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡурҡаҡ, өркәк, ҡурҡыусан, өркөүсән; **пугли́вая ло́шадь** өркәк ат; **быть пугли́вым** ҡурҡаҡ булыу

**ПУГНУ́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* ҡурҡытып (өркөтөп) ебәреү

**ПУ́ГОВИЦА** *ж* төймә, һиҙәп; **застегну́ть пу́говицы** төймәләрҙе элеү

**ПУ́ГОВИЧНЫЙ,** -ая, -ое төймә (һиҙәп) ...ы; **пу́говичное произво́дство** төймә етештереүсе

**ПУ́ГОВКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **пу́говица** **2.** *см.* **кно́пка** 3 ♦ **нос пу́говкой** *шутл.* төймә танау, борсаҡ танау

**ПУД** *м* бот; **пуд муки́** бер бот он ♦ **пуд со́ли съесть** *см.* **соль**

**ПУ́ДЕЛЬ** *м* пудель (*йөнтәҫ өй эте*)

**ПУ́ДИНГ** *м* пудинг (*ҡабартма*); **творо́жный пу́динг** эремсек пудингы

**ПУДОВИ́К** *м* бер ботлоҡ гер

**ПУДО́ВКА** *ж*; *разг.* бер бот (*үлсәм*)

**ПУДО́ВЫЙ** и *уст.* **ПУДОВО́Й,** -ая, -ое ботлоҡ, бер ботлоҡ; **пудо́вая ги́ря** бер ботлоҡ гер

**ПУ́ДРА** *ж* пудра; **покрыва́ть лицо́ пу́дрой** биткә пудра яғыу

**ПУ́ДРЕНИЦА** *ж* пудра һауыты

**ПУ́ДРЕНЫЙ,** -ая, -ое пудраланған, пудра яғылған

**ПУ́ДРИТЬ** *несов. кого-что* пудралау, пудра һөртөү (яғыу); **пу́дрить лицо́** битте пудралау

**ПУ́ДРИТЬСЯ** *несов.* пудраланыу, пудра һөртөнөү (яғыныу)

**ПУЗА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прост.* ҙур ҡорһаҡлы (эсле), күпкәк; **пуза́тая коро́ва** ҙур ҡорһаҡлы һыйыр **2.** *разг.* ҙур, ҡорһағы ҙур, йыуан, йыуан ҡорһаҡлы; **пуза́тый самова́р** ҙур самауыр

**ПУ́ЗО** *с*; *прост.* ҡорһаҡ, эс; **отрасти́ть пу́зо** ҡорһаҡ үҫтереү

**ПУЗЫРЁК** *м* **1.** *уменьш. от* **пузы́рь** 1, 2; **2.** бәләкәй шешә; **пузырёк с лека́рством** дарыулы бәләкәй шешә

**ПУЗЫРИ́ТЬСЯ** и **ПУЗЫ́РИТЬСЯ** *несов.* **1.** күбекләнеү, ҡыуыҡланыу, өрөлөү; **ка́пли дождя́ пузыря́тся в лу́жах** күләүектә ямғыр тамсылары күбекләнә **2.** *разг.* (*вздуваться*) күпереү, ҡабарыу, өрөлөү; **те́сто пузыри́тся** ҡамыр ҡабара **3.** *перен.*, *прост.* (*сердиться*) үсегеү, үсегеп асыуланыу, ҡабарыныу

**ПУЗЫРЧА́ТКА** *ж* ҡыуыҡлы үлән (*һыу үҫемлеге*)

**ПУЗЫ́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое ҡыуыҡлы, күбек; **пузы́рчатое стекло́** күбек быяла

**ПУЗЫ́РЬ** *м* **1.** ҡыуыҡ; **мы́льные пузыри́** һабын ҡыуыҡтары **2.** *разг.* күпертке, ҡыуыҡса; **появле́ние пузыре́й на ко́же** тирелә күпертке хасил булыу **3.** *анат.* ҡыуыҡ; **же́лчный пузы́рь** үт ҡыуығы; **мочево́й пузы́рь** бәүел ҡыуығы; **пла́вательный пузы́рь** йөҙөү ҡыуығы **4.** резина ҡыуыҡ (*тәнде һыуытыу йәки йылытыу өсөн ҡулланыла*) **5.** *прост.* лампа ҡыуығы ♦ **мы́льный пузы́рь** *см.* **мы́льный**; **пуска́ть пузыри́** *шутл.* ауыр хәлдә ҡалыу, эш мөшкөлләнеү

**ПУК** *м* бәйләм, тотам, ус, усма, өлтөк, шәлкем; **пук воло́с** бер өлтөк сәс; **пук соло́мы** бер бәйләм һалам

**ПУЛЕВО́Й,** -ая, -ое пуля …ы, пулянан булған; **пулево́е ране́ние** пуля яраһы

**ПУЛЕМЁТ** *м* пулемёт; **ручно́й пулемёт** ҡул пулемёты

**ПУЛЕМЁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** пулемётсы(лар) …ы; **пулемётная ро́та** пулемётсылар ротаһы **2.** пулемёт(тар) …ы; **пулемётный ого́нь** пулемёт уты

**ПУЛЕМЁТЧИК** *м* и **ПУЛЕМЁТЧИЦА** *ж* пулемётсы

**ПУЛЕНЕПРОБИВА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое пуля үткәрмәй торған; **пуленепробива́емое стекло́** пуля үткәрмәй торған быяла

**ПУЛЬВЕРИЗА́ТОР** *м* һиптергес

**ПУЛЬВЕРИЗА́ЦИЯ** *ж* һиптереү; **пульвериза́ция раство́ра** шыйыҡлыҡ һиптереү

**ПУЛЬНУ́ТЬ** *сов. см.* **пуля́ть**

**ПУ́ЛЬПА** *ж* **1.** (*мякоть чего-л.*) йомшаҡ, үҙәк; **пу́льпа зу́ба** теш йомшағы емеш йомшағы, **2.** *тех.* пульпа (*эшкәртеү өсөн ваҡланған, һыуға йәки иреткестәргә болғанған руда*)

**ПУЛЬС** *м* **1.** пульс, (тамыр) тибеш(е); **сла́бый пульс** әкрен (һиҙелер-һиҙелмәҫ) тибеш; **прове́рить пульс** тамыр тибешен тикшереү **2.** *чего, какой*; *перен.* пульс, тын алыш, торош, хәл; **пульс обще́ственной жи́зни** йәмғиәттең тын алышы

**ПУЛЬСА́ЦИЯ** *ж* тибеш; **пульса́ция се́рдца** йөрәк тибеше

**ПУЛЬСИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** тибеү, ҡағыу (*йөрәк, ҡан тураһында*) **2.** *спец.* пульсациялау, килеү (*үҙгәрешле ағып тороу*); **ток пульси́рует** ток килә

**ПУЛЬТ** *м*; *в разн. знач.* пульт; **дирижёрский пульт** дирижёр пульты; **пульт управле́ния электроста́нцией** электр станцияһының идара пульты

**ПУ́ЛЯ** *ж* **1.** пуля; **бронебо́йная пу́ля** броня тишкес пуля; **трасси́рующая пу́ля** яҡтыртып барыусы пуля **2.** *в знач. нареч.* **пу́лей**; *разг.* атылып, пуля кеүек; **вы́лететь пу́лей** атылып килеп сығыу

**ПУЛЯ́РКА** *ж* һимертелгән тауыҡ

**ПУЛЯ́ТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** атыу; **пуля́ть в во́здух** һауаға атыу **2.** *что*, *чем* бәреү, атыу; **пуля́ть ка́мни** таш бәреү

**ПУ́МА** *ж* пума (*ҙур ҡырағай бесәй*)

**ПУНКТ** *м* **1.** *в разн. знач.* пункт, урын; **наблюда́тельный пункт** күҙәтеү урыны; **перегово́рный пункт телефо́нной ста́нции** телефон станцияһының һөйләшеү пункты; **призывно́й пункт** хәрби хеҙмәткә саҡырыу пункты **2.** бүлек, пункт; **соглаше́ние из пяти́ пу́нктов** биш бүлектән торған килешеү **3.** (*момент в развитии чего-л.*) нөктә, кимәл; **кульминацио́нный пункт** иң юғары нөктә **4.** *типогр.* пункт ♦ **населённый пункт** ҡала, ауыл, ҡасаба һ.б.; **по пу́нктам**; **пункт за пу́нктом** ентекләп, тәпсирләп, нөктәһенә тиклем (аңлатыу)

**ПУНКТИ́Р** *м* пунктир, нөктә һыҙыҡ, өҙөк һыҙыҡ; **поме́тить пункти́ром** нөктә һыҙыҡ менән билдәләү

**ПУНКТИ́РНЫЙ,** -ая, -ое пунктир (*пунктир менән билдәләнгән*); **пункти́рная ли́ния** пунктир һыҙыҡ

**ПУНКТУА́ЛЬНОСТЬ** *ж* пунктуаллек, теүәллек, еткереп эшләү, тәпсирлек; **проявля́ть пунктуа́льность в рабо́те** эштә тәпсирлек күрһәтеү

**ПУНКТУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое пунктуаль, тәпсирле, теүәл үтәүсән; **пунктуа́льный челове́к** пунктуаль кеше

**ПУНКТУАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *грам.* пунктуацион, тыныш билдәләре, пунктуация ...ы; **пунктуацио́нные пра́вила** тыныш билдәләре ҡуйыу ҡағиҙәләре

**ПУНКТУА́ЦИЯ** *ж*; *грам.* пунктуация (*тыныш билдәләренең ҡуйылыш системаһы*)

**ПУНЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡан ҡыҙыл, сейә ҡыҙыл

**ПУНШ** *м* пунш (*ҡыҙыл араҡының бер төрө*)

**ПУ́НШЕВЫЙ,** -ая, -ое пуншлы, пунш ...ы; **пу́ншевая конфе́та** пуншлы кәнфит

**ПУП** *м*; *разг. см.* **пупо́к** 1 ♦ **пуп земли́** *кто-что*; *ирон.* кәрәкле кишер япрағы

**ПУПА́ВКА** *ж* тау сәскәһе, һары ромашка

**ПУПОВИ́НА** *ж*; *анат.* кендек, кендек бауы

**ПУПО́К** *м* **1.** кендек **2.** *зоол.* ҡош бөрләтәүенең аҫҡы өлөшө

**ПУПО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое кендек ...ы; **пупо́чная гры́жа** кендек бүҫере

**ПУПЫ́РИСТЫЙ,** -ая, -ое *см.* **пупы́рчатый**

**ПУПЫ́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое ҡутырлы; **пупы́рчатая ко́жа** ҡутырлы тире

**ПУПЫ́РЫШЕК** *м*; *разг.* ҡутыр, һытҡы

**ПУРГА́** *ж* көслө буран; **поднима́ется пурга́** көслө буран күтәрелә

**ПУРЖИ́ТЬ** *несов.*, *безл.*; *разг.* буранлау, буран күтәрелеү, ҡар өйөрөлөү

**ПУРИ́ЗМ** *м* пуризм, пуристлыҡ (**1.** *үтә саф, талапсан булып ҡыланыу* **2.** *телдең сафлығын, нормаларын һаҡлау өсөн, башҡа телдәрҙән һүҙ алмаҫҡа тырышыу*)

**ПУРИ́СТ** *м* и **ПУРИ́СТКА** *ж* пурист (*пуризм яҡлы кеше*)

**ПУРИТА́НИН** *м* и **ПУРИТА́НКА** *ж* пуритан (**1.** *XVI—XVII бб. Англия буржуазияһы араһында таралған дини-сәйәси ағымда ҡатнашыусы* **2.** *тормошта, көнкүрештә үтә тыйнаҡлылыҡ яҡлы кеше*)

**ПУРИТА́НСТВО** *с* пуританлыҡ

**ПУ́РПУР** *м* пурпур (**1.** *ҡарағусҡыл, ҡуйы ҡыҙыл төҫ* **2.** *ҡуйы ҡыҙыл буяу* **3.** *иҫк. ҡуйы ҡыҙыл туҡыма йәки шундай туҡыманан тегелгән затлы кейем*)

**ПУ́РПУРНЫЙ** и **ПУРПУ́РНЫЙ,** -ая, -ое ҡуйы ҡыҙыл, пурпурға буялған; **пурпу́рное не́бо** ҡуйы ҡыҙыл күк

**ПУРПУ́РОВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **пу́рпурный**

**ПУСК** *м см.* **пусти́ть — пуска́ть** 3–6, 9; **пуск турби́ны** турбинаны ебәреү; **пуск па́ра** пар сығарыу

**ПУСКА́Й** *частица* и *союз*; *разг. см.* **пусть**

**ПУСКА́ТЕЛЬ** *ж* пускатель (*электр двигателендә*)

**ПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **пусти́ть**

**ПУСКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **пусти́ться** **2.** *страд. от* **пуска́ть**

**ПУСКА́Ч** *м*; *разг.* пускач (*механизмды эшләтеп ебәрә торған*)

**ПУСКОВО́Й,** -ая, -ое **1.** сафҡа индерә торған, эшләй башлау ...ы; **пусково́й объе́кт** сафҡа индерә торған объект; **пусково́й пери́од** эшләй башлау осоро **2.** эшләтеп ебәреү ...ы, эшләтеп (хәрәкәткә килтереп) ебәрә торған; **пусково́й механи́зм** эшләтеп ебәрә торған механизм

**ПУСТЕЛЬГА́** *ж* торомтай

**ПУСТЕ́ТЬ** *несов.* бушау, бушап ҡалыу; **ве́чером у́лицы пусте́ют** кисен урамдар бушап ҡала

**ПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ебәреү, сығарып ебәреү; **пусти́ть пти́цу на во́лю** ҡошто ирекқә сығарып ебәреү; **пусти́ его́, не держи́** ебәр уны, тотма **2.** *кого-что* ебәреү, рөхсәт итеү; **пусти́ть в о́тпуск** ялға ебәреү; **пусти́ть коня́ на траву́** атты үләнгә ебәреү **3.** *кого-что* индереү, ебәреү; **пусти́ть квартира́нта** квартирант индереү; **пусти́ть ночева́ть** ҡунырға индереү **4.** *что* хәрәкәткә килтереү, сафҡа индереү, эшләтеп ебәреү; **пусти́ть заво́д** заводты эшләтеп ебәреү **5.** *что* ебәреү, йөрөтә башлау; **пусти́ть авто́бус по но́вому маршру́ту** яңы маршрут буйынса автобус ебәреү **6.** *что*, *чем* ебәреү, бәреү, елгәреү; **пусти́ть ка́мнем в окно́** тәҙрәгә таш бәреү **7.** *что*; *разг.* ебәреү, таратыу; **пусти́ть слух** хәбәр ебәреү **8.** *что* (*дать росток*, *корни*) ебәреү, үҫә башлау, сығарыу; **дубо́к пусти́л ко́рни** йәш имән тамыр ебәрҙе **9.** (*с предлогом "в"*) -ға/-гә ебәреү (биреү); **пусти́ть в прода́жу** һатыуға ебәреү; **пусти́ть в прока́т** ҡуртымға биреү ♦ **пусти́ть козла́ в огоро́д** *см.* **козёл**; **пусти́ть ко́рни** *см.* **ко́рень**; **пусти́ть (кра́сного) петуха́** *см.* **пету́х**; **пусти́ть пыль в глаза́** *см.* **пыль**; **пусти́ть в де́ло** *см.* **де́ло**; **пусти́ть в оборо́т** әйләнешкә индереү; **пусти́ть в ход** эшләтеп ебәреү; **пусти́ть на дно** *см.* **дно**; **по́ миру пусти́ть** *см.* **мир**

**ПУСТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** китеү, сығыу, юл тотоу; **пусти́ться в путь** юлға сығыу; **пусти́ться в пого́ню** ҡыуып китеү **2.** *во что* и *с неопр.* башлау, тотоноу, керешеү; **пусти́ться бежа́ть** йүгерә башлау; **пусти́ться в пляс** бейергә тотоноу ♦ **пусти́ться во все тя́жкие** *см.* **тя́жкий**

**ПУ́СТО 1.** *нареч.* буш; **смотре́ть равноду́шно и пу́сто** хуш күңел һәм буш ҡараш менән ҡарау **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* буш, буп-буш; **в ко́мнате бы́ло пу́сто** бүлмә буш ине; **на душе́ пу́сто** күңелем буп-буш ♦ **чтоб тебе́ (ему́, ей, вам, им) пу́сто бы́ло** ҡәһәр һуҡһын, суҡынып китһен (китегеҙ)

**ПУСТОВА́ТЬ** *несов.* буш булыу (тороу); **ко́мната пусту́ет** бүлмә буш тора

**ПУСТОГОЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* мәғәнәһеҙ, буш, кәбәк баш

**ПУСТОЗВО́Н** *м*; *разг.* ярыҡ барабан, буш боғаҙ, лығырлаҡ

**ПУСТОЗВО́НИТЬ** *несов.* лығырлау, таҡылдау

**ПУСТОЗВО́НСТВО** *с* лығырлаҡ булыу, бушҡа боғаҙ киреү, шапырыныу

**ПУСТО́Й,** -ая, -ое **1.** буш; **пуста́я бо́чка** буш мискә; **пусто́й дом** буш өй **2.** (*полый*) (эсе) ҡыуыш, көпшә; **пусто́й шар** ҡыуыш шар **3.** *перен.* буш, мәғәнәһеҙ; **пусто́й челове́к** буш кеше; **пусты́е обеща́ния** буш вәғәҙәләр; **пуста́я кни́га** мәғәнәһеҙ китап **4.** *перен.* әһәмиәтһеҙ, юҡ, бәләкәй; **пусто́й по́вод** юҡ сәбәп **5.** *в знач. сущ.* **пусто́е** *с* юҡ, буш нәмә; **говори́ть пусто́е** бушты һөйләү ♦ **перелива́ть из пусто́го в поро́жнее** *см.* **поро́жний**; **пуста́я поро́да** *горн.* буш руда; **пусто́й карма́н (кошелёк)** буш кеҫә (*аҡсаһыҙ*); **пусто́е ме́сто** буш кеше; **с пусты́ми рука́ми (прийти́, яви́ться, уйти́ и т.п.)** буш ҡул менән (килеү, булыу, китеү һ.б.)

**ПУСТОМЕ́ЛЯ** *м* и *ж*; *разг.* тел бисҙтәһе, тәтелдәк

**ПУСТОПОРО́ЖНИЙ,** -яя, -ее *разг.* буш, мәғәнәһеҙ; **пустопоро́жняя диску́ссия** буш бәхәс

**ПУСТОСЛО́В** *м*; *разг.* буш боғаҙ, ләстит һатыусы, лығырлаҡ

**ПУСТОСЛО́ВИЕ** *с*; *разг.* ләстит, сафсата, буш һүҙ

**ПУСТОСЛО́ВИТЬ** *несов.*; *разг.* юҡ-бар (буш һүҙ) һөйләү, ләстит һатыу

**ПУСТОТА́** *ж* **1.** бушлыҡ, (эсе) ҡыуыш булыу; **пустота́ до́ма** өйҙөң бушлығы; **пустота́ ша́ра** шарҙың эсе ҡыуыш булыу **2.** бушлыҡ, мәғәнәһеҙлек; **пустота́ жи́зни** тормоштоң мәғәнәһеҙлеге **3.** *перен.* рухи бушлыҡ, өмөтһөҙлөк, күңел бушлығы; **чу́вствовать пустоту́** күңел бушлығы тойоу **4.** *тех.* ҡыуышлыҡ, бушлыҡ, ҡыуыш урын; **пусто́ты в литье́** ҡойолмалағы бушлыҡ

**ПУСТОТЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое (эсе) ҡыуыш, ҡыуыш эсле; **пустоте́лый кирпи́ч** ҡыуыш эсле кирбес

**ПУСТОЦВЕ́Т** *м* **1.** *бот.* буш (ҡыҫыр) сәскә **2.** *перен.* булдыҡһыҙ (буш) кеше

**ПУ́СТОШЬ** *ж* ташландыҡ ер, буш ятҡан ер

**ПУСТЫ́ННИК** *м* пустынник, монах (*христиандарҙа һәм башҡа диндәрҙә донъяуи рәхәтлектәрҙән баш тартып, кешеләрҙән ситләшеп йәшәүсе*)

**ПУСТЫ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** сүл ...ы; **пусты́нный барс** сүл барсы **2.** кешеһеҙ, кеше йәшәмәгән; **пусты́нный о́стров** кеше йәшәмәгән утрау **3.** буш, кеше йөрөмәгән; **пусты́нная у́лица** кеше йөрөмәгән урам

**ПУСТЫ́НЯ** *ж* сүл; **прое́хать пусты́ню** сүлде үтеү

**ПУСТЫ́РНИК** *м* арыҫлан ҡойроғо (*дарыу үләне*)

**ПУСТЫ́РЬ** *м* ташландыҡ (буш) ер

**ПУСТЫ́ШКА** *разг.* **1.** *ж* эсе ҡыуыш (нәмә), эсе буш (нәмә); **оре́х-пусты́шка** эсе буш сәтләүек **2.** *ж* (*соска*) имеҙлек **3.** *м* и *ж*; *перен.* буш кеше, елғыуар, эшкинмәгән

**ПУСТЬ** *частица* и *союз* **1.** *частица* (*для выражения согласия*) -һын/-һен әйҙә, -а/-ә бирһен; **пусть идёт** килһен әйҙә **2.** *частица* (*всё равно*) ярар, шулай булһын; **ну и пусть, я пойду́** йә ярар, мин барам **3.** *союз уступ.* (*допустим*) ярай (булһын), да ти, әйҙә; **пусть я оши́бся, но оши́бку испра́вил** ярай, мин хаталандым да ти, әммә хатамды төҙәттем ♦ **пусть себе́**; **пусть его́ (её, их)** ярар, шулай ҙа булһын

**ПУСТЯ́К** *м*; *разг.* **1.** юҡ-бар нәмә, ваҡ-төйәк, сүп-сар; **поссо́риться из-за пустяка́** юҡ-бар нәмә өсөн асыуланышыу **2.** *обычно мн.* **пустяки́** буш (юҡ) һүҙ, мәғәнәһеҙ һүҙ; **говори́ть пустяки́** буш һүҙ һөйләү **3.** *обычно мн.* **пустяки́** *в знач. сказ.* зарар юҡ, бер ни түгел; **вам бо́льно? — Пустяки́** һеҙгә ауырттымы? — Зарар юҡ ♦ **па́ра пустяко́в** бер ни түгел

**ПУСТЯКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** ваҡ-төйәк, буш, әһәмиәтһеҙ, бәләкәй генә; **пустяко́вый вопро́с** ваҡ мәсьәлә; **пустяко́вая су́мма** бәләкәй генә сумма **2.** (*нетрудный*) еңел генә; **пустяко́вое поруче́ние** еңел генә йомош

**ПУСТЯ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **пустяко́вый**

**ПУ́ТАНИК** *м*; *разг.*, *неодобр.* бутаусы, буталсыҡ кеше, болғаҡ

**ПУ́ТАНИЦА** *ж*; *в разн. знач.* буталыш, буталсыҡлыҡ, сыуалсыҡлыҡ; **пу́таница мы́слей** фекер буталсыҡлығы

**ПУ́ТАНЫЙ,** -ая, -ое **1.** буталсыҡ, сыуалсыҡ; **пу́таные объясне́ния** буталсыҡ аңлатмалар **2.** *разг.* буталсыҡ, еңел аҡыллы; **пу́таный челове́к** буталсыҡ кеше

**ПУТАССУ́** *ж нескл.* путассу (*диңгеҙ балығы*)

**ПУ́ТАТЬ** *несов.* **1.** *что* сеймәлтәү, сейәлтеү, сырмалтыу, сейәләндереү, сыуаландырыу; **пу́тать пря́жу** иләгән епте сейәлтеү **2.** *что* (*нарушать порядок расположения*) бутау, сыуалтыу; **пу́тать ряды́** рәттәрҙе бутау; **пу́тать страни́цы ру́кописи** ҡулъяҙманың биттәрен бутау **3.** *кого-что* (*сбивать с толку*) бутау, яңылыштырыу; **пу́тать вопро́сами** һорауҙар менән бутау **4.** *что* и *без доп.* бутау, яңылышыу; **расска́зывать, не пу́тая** бутамай һөйләү **5.** *кого-что*; *разг.* (*вовлекать*) бутау, ҡатнаштырыу, ҡыҫтырыу; **пу́тать в неблагови́дные дела́** насар эштәргә ҡатнаштырыу **6.** *кого-что* (*смешивать*) бутау, буташтырыу; **пу́тать имена́** исемдәрҙе бутау **7.** *кого-что* тышаулау, тышау; **пу́тать лошаде́й** аттарҙы тышау ♦ **пу́тать следы́** эҙ яҙҙырыу, эҙ йәшереү

**ПУ́ТАТЬСЯ** *несов.* **1.** сеймәлеү, сейәлеү, сейәләнеү, сырмалыу; **нить пу́тается** еп сейәлә **2.** *перен.*, *разг.* (*о мыслях, словах и т.п.*) буталыу, сыуалыу **3.** в *чём* эләгеү, тейеү, буталыу; **но́ги пу́таются в за́рослях** сыбыҡ-сабыҡҡа аяҡ эләгә **4.** *разг.* хаталаныу, буталыу; **пу́таться в отве́тах** яуап биргәндә буталыу **5.** *во что*; *разг.* ҡыҫылыу, буталыу, тығылыу; **пу́таться не в своё де́ло** кеше эшенә ҡыҫылыу **6.** *с кем*; *прост.*, *пренебр.* буталыу, мөнәсәбәткә инеү **7.** *страд. от* **пу́тать** ♦ **пу́таться под нога́ми** аяҡ аҫтында буталыу (*ҡамасаулау*)

**ПУТЁВКА** *ж* путёвка; **путёвка в санато́рий** шифаханаға путёвка; **вы́писать путёвку** *спец.* путёвка яҙҙырыу (*машинаға*) ♦ **путёвка в жизнь** тормошҡа путёвка (*эштә, тормошта асылған юл*)

**ПУТЕВОДИ́ТЕЛЬ** *м* (*справочник*) белешмә; **путеводи́тель по музе́ю** музей буйынса белешмә; **железнодоро́жный путеводи́тель** тимер юл буйынса белешмә

**ПУТЕВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое юл күрһәтеүсе; **путево́дные зна́ки** юл күрһәтеүсе билдәләр ♦ **путево́дная звезда́** юл күрһәтеүсе йондоҙ (*тормошта йүнәлеш биреүсе*)

**ПУТЕВО́Й,** -ая, -ое юл …ы; **путевы́е расхо́ды** юл сығымдары; **путевы́е запи́ски** юл яҙмалары

**ПУТЁВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **пу́тный**

**ПУТЕ́ЕЦ** *м*; *разг.* **1.** тимер юл инженеры **2.** тимер юл эшсеһе, тимер юлсы

**ПУТЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое (тимер) юл …ы; **путе́йский рабо́чий** тимер юл эшсеһе

**ПУТЁМ I** *нареч.*; *разг.* рәтләп, йүнләп; **рассказа́ть путём** йүнләп һөйләп биреү

**ПУТЁМ II** *предлог с род. п.* (*посредством*) юлы (ярҙамы) менән, -ып/-еп **узна́ть путём опро́са** һорашып белеү

**ПУТЕОБХО́ДЧИК** *м* тимер юлды ҡараусы (*эшсе*)

**ПУТЕПРОВО́Д** *м* юл күпере, юл үткәргес (*юлдар киҫешкән ерҙә*)

**ПУТЕУКЛА́ДКА** *ж*; *ж.-д.* тимер юл һалыу

**ПУТЕУКЛА́ДЧИК** *м* (*машина*) тимер юл һалғыс

**ПУТЕШЕ́СТВЕННИК** *м* и **ПУТЕШЕ́СТВЕННИЦА** *ж* сәйәхәтсе, илгиҙәр

**ПУТЕШЕ́СТВИЕ** *с* сәйәхәт, ил гиҙеү; **кругосве́тное путеше́ствие** Ер шары тирәләй сәйәхәт, донъя буйлап сәйәхәт итеү

**ПУТЕШЕ́СТВОВАТЬ** *несов.* сәйәхәт итеү, ил гиҙеү; **путеше́ствовать по тайге́** тайга буйлап сәйәхәт итеү

**ПУТИ́НА** *ж* балыҡ тотоу мәле, балыҡ ваҡыты; **весе́нняя пути́на** яҙғы балыҡ тотоу мәле

**ПУ́ТНИК** *м* и **ПУ́ТНИЦА** *ж* юлсы, юлаусы

**ПУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** йүнле, рәтле, булдыҡлы, яраҡлы; **пу́тный челове́к** йүнле кеше; **из э́того ничего́ пу́тного не вы́йдет** бынан бер йүнле нәмә лә сыҡмаҫ **2.** файҙалы, эшлекле; **пу́тный сове́т** файҙалы кәңәш

**ПУТЧ** *м* фетнә; **подня́ть путч** фетнә күтәреү

**ПУТЧИ́СТ** *м* фетнәсе

**ПУ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **пу́то** *с*; *прост.*) **1.** тышау, кешән (*атҡа*) **2.** *чего*; *прям.*, *перен.* бығау, сынйыр; **разорва́ть пу́ты колониали́зма** колониализм бығауҙарын өҙөү

**ПУТЬ** *м*; *в разн. знач.* юл; **во́дный путь** һыу юлы; **возду́шный путь** һауа юлы; **железнодоро́жный путь** тимер юл; **широ́кий путь** киң юл; **пути́ сообще́ния** юлдар (*һауа юлы, тимер юл, һыу юлы*); **дыха́тельные пути́** *анат.* тын юлдары; **запасно́й путь** *ж.-д.* запас юл; **объездно́й путь** урау юл; **пути́ разви́тия** үҫеш юлдары; **держа́ть путь** юл тотоу; **пути́ достиже́ния** *чего-л.* *нимәгәлер* ирешеү юлдары ♦ **жи́зненный путь** тормош юлы; **Мле́чный Путь** *см.* **мле́чный**; **после́дний путь** һуңғы юл (*ерләү*); **счастли́вого пути́!** хәйерле юл!; **по пути́**: 1) юл ыңғайы, юл айҡан; 2) бер үк йүнәлештә; 3) бергә; **не по пути́** бергә түгел; **быть на пути́** (маҡсатҡа) яҡынайыу, етеп килеү; **встать (стать, вступи́ть) на путь** йүнәлеш алыу, юлына баҫыу; **напра́вить (наста́вить, обрати́ть) на путь и́стины (на и́стинный путь)** *кого* дөрөҫ юл күрһәтеү, дөрөҫ юлға баҫтырыу (төшөрөү); **сбить (совле́чь, сврати́ть) с пути́** юлдан яҙҙырыу

**ПУФ** *м* пуф (*артһыҙ йомшаҡ ултырғыс*)

**ПУХ** *м* мамыҡ; (*козы*) дебет; **лебя́жий пух** аҡҡош мамығы; **пух одува́нчика** бәпембә мамығы; **тополи́ный пух** тирәк мамығы ♦ **в пух (и прах) (разби́ть, разгроми́ть, разнести́ и т.д.)** көлөн күккә осороу; **ни пу́ха ни пера́** хәйерлегә булһын; **пусть бу́дет земля́ пу́хом** ауыр тупрағы еңел булһын (*үлгән кешегә ҡарата*)

**ПУ́ХЛОСТЬ** *ж* ҡабарынҡылыҡ, өрөлөп тороу; **пу́хлость щёк** яңаҡтарҙың ҡабарынҡылығы

**ПУ́ХЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡабарынҡы, өрөнкө; **пу́хлая поду́шка** ҡабарынҡы мендәр; **пу́хлые гу́бы** өрөнкө ирендәр **2.** тулы кәүҙәле, йыуан; **пу́хлый челове́к** йыуан кеше

**ПУ́ХНУТЬ** *несов.* **1.** ҡабарыу, шешеү, күбеү; **нога́ пу́хнет** аяҡ шешә **2.** *прост.* һимереү, ҡабарыу

**ПУХОВИ́К** *м* **1.** (*перина*) мамыҡ мендәр **2.** мамыҡ пальто (куртка); **тёплый пухови́к** йылы мамыҡ пальто

**ПУХО́ВКА** *ж* кершән яҡҡыс, пудра һөрткөс

**ПУХО́ВЫЙ,** -ая, -ое мамыҡ, дебет; **пухо́вый плато́к** дебет шәл; **пухо́вая поду́шка** мамыҡ мендәр

**ПУХОЕ́Д** *м* мамыҡ ҡорто, ҡош-ҡорт бете

**ПУЧЕГЛА́ЗИЕ** *с* аҡыш күҙлелек (*гәҙәттә ауырыуҙан*)

**ПУЧЕГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое *разг.* аҡыш (таҫыр) күҙле; **пучегла́зый челове́к** аҡыш күҙле кеше

**ПУЧИ́НА** *ж* **1.** упҡын, тоба; **морска́я пучи́на** диңгеҙ упҡыны **2.** батҡыл, соңғол (*һаҙлыҡта*) **3.** *спец.* бүртек, ҡабарыҡ (*ҡышҡы юлдағы*)

**ПУ́ЧИТЬ** *несов. что*; *разг.* **1.** *безл.* күбеү, ҡабарыу, күптереү, ҡабартыу; **пу́чит живо́т** эс күбә **2.** (*таращить*) аҡырайтыу, аҡайтыу; **пу́чить глаза́** күҙҙе аҡайтыу

**ПУ́ЧИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** күбеү, ҡабарыу, күтәрелеү; **те́сто пу́чится** ҡамыр ҡабара; **река́ пу́чится** йылға күтәрелә **2.** аҡырайыу, аҡайыу (*күҙҙәр*)

**ПУЧО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **пук**; **пучо́к цвето́в** сәскә бәйләме **2.** шәлкем; **пучо́к луче́й** нурҙар шәлкеме

**ПУ́ШЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** туп ...ы, пушка ...ы; **пу́шечные я́дра** туп йәҙрәләре **2.** туптан, пушканан; **пу́шечный вы́стрел** туптан атыу ♦ **пу́шечное мя́со** туп аҙығы (*һуғышта үлемгә дусар ителгән һалдаттар*)

**ПУШИ́НКА** *ж* **1.** еңел, мамыҡ (*мамыҡ һымаҡ нәмәләр*) **2.** (*мелкая, лёгкая частица чего-л.*) бөртөк; **пуши́нки сне́га** ҡар бөртөктәре

**ПУШИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*покрытый пухом*) йомшаҡ (ҡабарынҡы) йөнлө; **пуши́стая ко́шка** ҡабарынҡы йөнлө бесәй; **пуши́стый ковёр** ҡабарынҡы йөнлө келәм **2.** (*лёгкий, мягкий, пышный*) мамыҡтай йомшаҡ; **пуши́стые во́лосы** мамыҡтай йомшаҡ сәс(тәр); **пуши́стый снег** мамыҡтай йомшаҡ ҡар **3.** (*с лёгкой, пышной зеленью*) ялбыр; **пуши́стая ёлка** ялбыр шыршы

**ПУШИ́ТЬ** *несов. что* (*шерсть*) тетеү; (*перья, волосы*) ҡабартыу, күпертеү

**ПУ́ШКА** *ж* **1.** туп, пушка; **зени́тная пу́шка** зенит тубы **2.** *мед.* пушка (*радиоактив нурҙар менән дауалау аппараты*) ♦ **взять на пу́шку** *прост.* алдау; **пу́шкой (из пу́шки) не прошибёшь (не пробьёшь)**: 1) бик күп, иҫәбе-хисабы юҡ (*халыҡ тураһында*); 2) кирегә бөткән, тиҫкәре; **из пу́шки по воробья́м (стреля́ть, пали́ть, бить)** ат менән ҡуян ҡыуыу (*бәләкәй генә эшкә оло итеп тотоноу, күп көс түгеү*)

**ПУШКА́РЬ** *м*; *уст.* тупсы

**ПУШНИ́НА** *ж собир.* йәнлек тиреһе, ҡиммәтле тире; **загото́вить пушни́ну** йәнлек тиреһе әҙерләү

**ПУШНО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡиммәтле тире ...ы, йәнлек тиреһе ...ы; **пушно́й про́мысел** ҡиммәтле тире әҙерләү промыслаһы **2.** ҡиммәт (затлы) тиреле; **пушно́й зверь** ҡиммәт тиреле кейек

**ПУШО́К** *м*; *уменьш. от* **пух**

**ПУ́ЩА** *ж* шырлыҡ, ҡара урман

**ПУ́ЩЕ** *нареч.*; *уст., прост.* ныҒыраҡ, көслөрәк, уғата; **пу́ще пре́жнего** элеккенән көслөрәк

**ПУ́ЩИЙ,** -ая, -ее *разг., уст.* көслө, ныҡ ҙур (оло); **пу́щая сла́ва** даны ныҡ ҙур ♦ **для пу́щей ва́жности** әһәмиәтлерәк күренһен өсөн, мөһимерәк булһын өсөн

**ПФЕ́ННИГ** *м* пфенниг (*Германия аҡса берәмеге*)

**ПЧЕЛА́** *ж* бал ҡорто, умарта ҡорто; **башки́рская пчела́** башҡорт бал ҡорто

**ПЧЕЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** (бал) ҡорто ...ы, умарта ҡорто ...ы; **пчели́ный мёд** ҡорт балы; **пчели́ный у́лей** бал ҡорто умартаһы **2.** *в знач. сущ.* **пчели́ные** *мн.*; *зоол.* бал ҡорттары

**ПЧЕЛОВО́Д** *м* умартасы, ҡорт ҡараусы

**ПЧЕЛОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое умартасылыҡ ...ы, ҡортсолоҡ ...ы; **пчелово́дные инструме́нты** умартасылыҡ ҡорамалдары

**ПЧЕЛОВО́ДСТВО** *с* **1.** (*отрасль сельского хозяйства*) умартасылыҡ, ҡортсолоҡ; **разви́тие пчелово́дства** умартасылыҡты үҫтереү **2.** (*пасека*) умарталыҡ; **пчелово́дство совхо́за** совхоздың умарталығы

**ПЧЕЛОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое умартасылыҡ ...ы, ҡортсолоҡ ...ы; **пчелово́дческое хозя́йство** умартасылыҡ хужалығы

**ПЧЕ́ЛЬНИК** *м* умарталыҡ

**ПШЕНИ́ЦА** *ж* бойҙай; **безо́стая пшени́ца** ҡылсыҡһыҙ бойҙай; **ози́мая пшени́ца** ужым бойҙайы; **ярова́я пшени́ца** ярауай бойҙай

**ПШЕНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое бойҙай ...ы; **пшени́чная мука́** бойҙай оно; **пшени́чные посе́вы** бойҙай сәсеүлектәре

**ПШЁНКА** *ж*; *прост.* тары бутҡаһы

**ПШЁННЫЙ,** -ая, -ое тары ...ы; **пшённая ка́ша** тары бутҡаһы

**ПШЕНО́** *с* тары ярмаһы

**ПШИК** *м*; *разг.* буш, һис бер ни, бер ни (юҡ); **получи́лся пшик** буш булып сыҡты

**ПЫЖ** *м* тығыҙлағыс, пыж (*патронды, зарядты тығыҙлай торған кейеҙ, ҡатырға һ.б.*)

**ПЫ́ЖИК** *м* пыжик (**1.** *болан балаһы* **2.** *болан балаһының тиреһе*)

**ПЫ́ЖИКОВЫЙ,** -ая, -ое пыжик (*болан балаһы тиреһенән эшләнгән*); **пы́жиковая ша́пка** пыжик бүрек

**ПЫ́ЖИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** (*напрягаться изо всех сил*) көсәнеү, тырышыу **2.** *перен.* (*кичиться*) тәкәбберләнеү, кәпәренеү, эреләнеү; **ему́ не сто́ит пы́житься** уға кәпәренеү кәрәкмәй

**ПЫЛ** *м* дәрт, ялҡын; **ю́ношеский пыл** йәшлек дәрте ♦ **в пылу́ (сраже́ния, би́твы, спора и т.п.)** иң ҡыҙған мәлендә (һуғыштың, бәхәстең һ.б.); **с пы́лу, с жа́ру** яңы ғына бешкән көйө

**ПЫЛА́ТЬ** *несов.* **1.** дөрләп яныу, ялҡынланып яныу; **дрова́ пыла́ют** утын дөрләп яна **2.** балҡыу, балҡып тороу; **за́рево пыла́ет** шәфәҡ балҡып тора **3.** ҡыҙарып тороу, яныу; **щёки пыла́ют** сикәләре яна **4.** *чем* и *без доп.*; *перен.* яныу, утында яныу; **пыла́ть любо́вью** мөхәббәт утында яныу

**ПЫЛЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое онтаҡ, саң кеүек; **пылеви́дный песо́к** саң кеүек ҡом

**ПЫЛЕВО́Й,** -ая, -ое саң ...ы, туҙан ...ы; **пылева́я бу́ря** саң бураны

**ПЫЛЕМЕ́Р** *м* саң үлсәгес (*прибор*)

**ПЫЛИ́НКА** *ж* **1.** саң бөртөгө **2.** *бот.* һеркәсек (*һеркә туҙаны*)

**ПЫЛИ́ТЬ** *несов.* саң күтәреү, туҙан туҙҙырыу; **маши́на пыли́т по доро́ге** машина юл буйлап туҙан туҙҙыра

**ПЫЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** саңланыу, туҙанланыу; **сапоги́ пыля́тся** итектәр саңлана **2.** (*лежать без применения*) саңланып (туҙанланып) ятыу; **кни́ги пыля́тся на по́лках** китаптар кәштәлә саңланып ята

**ПЫЛИ́ЩА** *ж*; *разг.* бик күп саң (туҙан), ныҡ саң (туҙан)

**ПЫ́ЛКИЙ,** -ая, -ое дәртле, янып торған; **пы́лкий ю́ноша** янып торған егет

**ПЫ́ЛКОСТЬ** *ж* дәртлелек, янып тороу; **прояви́ть пы́лкость** дәртлелек күрһәтеү

**ПЫЛЬ** *ж* **1.** саң, туҙан; **у́гольная пыль** күмер саңы; **подня́ть пыль** туҙан туҙҙырыу **2.** *см.* **пыльца́** ♦ **пусти́ть пыль в глаза́** күҙ буяу, күҙгә төтөн ебәреү

**ПЫ́ЛЬНИК I** *м*; *бот.* һеркәлек (*сәскәлә*)

**ПЫ́ЛЬНИК II** *м* ябынса (*саңдан ябына торған плащ*)

**ПЫ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое саңлы, туҙанлы; **пы́льная доро́га** саңлы юл

**ПЫЛЬЦА́** *ж* һеркә (*үсемлектәрҙә*)

**ПЫРЕ́Й** *м* аҡтамыр; **по́ле покры́то пыре́ем** баҫыу аҡтамыр менән ҡапланған

**ПЫРНУ́ТЬ** *кого-что*; *прост.* сәнсеү; (*рогами*) һөҙөү; **пырну́ть ножо́м** бысаҡ менән сәнсеү

**ПЫТА́ТЬ** *несов. кого-что* язалау, ғазаплау; **пыта́ть пле́нника** әсирҙе язалау

**ПЫТА́ТЬСЯ** *несов. с неопр.* тырышыу, тырышып (маташып) ҡарау; **пыта́ться освободи́ться** ҡотолорға тырышыу

**ПЫ́ТКА** *ж* **1.** яза, ғазап; **ору́дия пы́тки** яза ҡоралдары **2.** *перен.* (рухи) ғазап, ыҙа; **душе́вная пы́тка** күңел ғазабы

**ПЫТЛИ́ВОСТЬ** *ж* ҡыҙыҡһыныусанлыҡ; **пытли́вость ума́** аҡылдың ҡыҙыҡһыныусанлығы

**ПЫТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡһыныусан, ҡыҙығыулы; **пытли́вый взгляд** ҡыҙыҡһыныусан ҡараш

**ПЫ́ХАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** балҡып яныу; **пла́мя пы́шет** ялҡын балҡып яна **2.** *чем* и *без доп.* (*излучать жар*) эҫе бәреү (бөркөү); **печь пы́шет жа́ром** мейестән эҫе бәреп тора **3.** *чем*; *перен.* балҡып (бәреп) тороу; **его́ лицо́ пы́шет здоро́вьем** уның йөҙөнән һаулығы бәреп тора

**ПЫХНУ́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **пы́хать** 2

**ПЫХТЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** мышылдау, быхылдау, ауыр һулау **2.** (*о машинах*) ухылдау, борҡотоу; **парово́з пыхти́т** паровоз ухылдай **3.** *над чем* и *без доп.*; *перен.* көсәнеп тырышыу, маташыу; **пыхте́ть над реше́нием зада́чи** мәсьәләне сисергә маташыу

**ПЫ́ШКА** *ж* **1.** (*булочка*) ҡабартма **2.** *разг.*, *пренебр.* (*о ребёнке или женщине*) тултырған тауыҡ (өрөлгән) кеүек, ит бүкәне

**ПЫ́ШНОСТЬ** *ж* **1.** ҡупшылыҡ, тантаналыҡ; **пы́шность приёма** ҡабул итеүҙең тантаналығы **2.** ҡабарынҡылыҡ; **пы́шность ре́чи** телмәрҙең ҡабарынҡылығы

**ПЫ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡабарынҡы, ҡабарып (күпереп) торған; **пы́шные во́лосы** күпереп торған сәстәр **2.** (*полный — обычно о женщине*) тулы, йомро **3.** (*роскошный*) ҡупшы, тантаналы, бик бай; **пы́шный наря́д** ҡупшы, зиннәтле кейем **4.** (*напыщенный, высокопарный*) ҡабарынҡы; **пы́шные слова́** ҡабарынҡы һүҙҙәр

**ПЬЕДЕСТА́Л** *м* **1.** пьедестал, нигеҙ (*һәйкәл, статуя һ.б. биҙәлгән нигеҙе*) **2.** *перен.* дәрәжә, дан; **пьедеста́л почёта** хөрмәт даны

**ПЬЕ́СА** *ж* пьеса (**1.** *драматик әҫәр* **2.** *ҡыҫҡа ғына музыка әҫәре*); **пье́са в трёх де́йствиях** өс шаршаулы пьеса; **сыгра́ть пье́су на фортепья́но** фортепьянола пьеса уйнау

**ПЬЮ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **пить** **2.** *прил.*; *разг.* эскесе, эсергә яратыусы

**ПЬЯНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** иҫереү; **бы́стро пьяне́ть** тиҙ иҫереү **2.** *перен.* иҫереү, баш әйләнеү; **пьяне́ть от ра́дости** шатлыҡтан иҫереү

**ПЬЯНИ́ТЬ** *несов. кого* **1.** иҫертеү; **вино́ пьяни́т** шарап иҫертә **2.** *перен.* иҫертеү, башты әйләндереү

**ПЬЯ́НИЦА** *м* и *ж* эскесе, сәрхүш; **стать пья́ницей** эскесегә әйләнеү

**ПЬЯ́НКА** *ж*; *прост.* **1.** эскелек, эске мәжлесе **2.** *см.* **пья́нство**

**ПЬЯ́НСТВО** *с* эскеселек, эскелек; **борьба́ с пья́нством** эскелеккә ҡаршы көрәш

**ПЬЯ́НСТВОВАТЬ** *несов.* эсеүгә (эскелеккә) һалышыу (бирелеү), эсеп йөрөү

**ПЬЯ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** иҫерек, эскән, сәрхүш булған; **быть пья́ным** иҫерек булыу **2.** *в знач. сущ.* **пья́ный** *м* и **пья́ная** *ж* иҫерек кеше **3.** (*свойственный опьяневшим людям*) иҫеректәргә хас булған, иҫеректәрсә; **пья́ный разгово́р** иҫеректәрсә һөйләшеү **4.** *чем, от чего.*; *перен.* иҫергән, иҫерек; **пья́ный от любви́** мөхәббәттән иҫерек ♦ **с пья́ных глаз**; **под пья́ную ру́ку**; **по пья́ной ла́вочке**; **по пья́ному де́лу** *прост.* иҫерек килеш, иҫергән хәлдә (көйө)

**ПЭР** *м* пэр (*Англияла һәм Францияла юғары ҡатлам аҡһөйәктәр титулы*)

**ПЮПИ́ТР** *м* пюпитр (*нота дәфтәре, китаптар ҡуйыу өсөн ҡыя өҫлө өҫтәл*)

**ПЮРЕ́** *с нескл.* пюре, иҙмә; **карто́фельное пюре́** картуф иҙмәһе

**ПЯДЕ́НИЦА** *ж* ҡороткос күбәләк

**ПЯДЬ** *ж* ҡарыш (*оҙонлоҡ үлсәме*) ♦ **ни пя́ди (земли́ не отда́ть, не уступи́ть)** бер ҡарыш та (ер бирмәү); **семи́ пя́дей во лбу́** бик аҡыллы, аҡыл эйәһе

**ПЯ́ЛИТЬ** *несов. что* **1.** *разг.*, *спец.* тартып һуҙыу, киңәйтеү; **пя́лить овчи́ну** һарыҡ тиреһен тартып һуҙыу **2.** *прост.* (*таращить глаза*) секрәйеп ҡарау, күҙ төбәү

**ПЯ́ЛЬЦЫ** *только мн.* кирге

**ПЯСТЬ** *ж* ус һөйәктәре

**ПЯТА́** *ж* **1.** *уст.* (*пятка*) үксә **2.** *спец.* (*опорная часть чего-л.*) терәк, табан ♦ **до пят** бик оҙон, үксәгә тиклем; **по пята́м (ходи́ть, гна́ться и т.п.)** үксәһенә баҫып (йөрөү), артынан ҡалмау; **с головы́ до пят** башынан аяғына тиклем

**ПЯТА́К** *м*; *разг.* биш тинлек (*аҡса*)

**ПЯТАЧО́К** *м*; *разг.* **1.** *см.* **пята́к** **2.** (*рыло свиньи и т.п.*) морон осо **3.** (*площадка*) майҙансыҡ

**ПЯТЁРКА** *ж* **1.** (*цифра, карта*) бишлек **2.** *разг.* (*о транспортных средствах*) бишенсе (*автобус, трамвай һ.б.*) **3.** *разг.* (*группа из пяти единиц*) биш; **пятёрка ка́теров** биш катер **4.** (*оценка*) биш, бишле; **получи́ть пятёрку** бишле алыу **5.** *разг.* (*денежный знак, сумма в пять рублей*) бишлек, биш һумлыҡ, биш һум

**ПЯТЕРНЯ́** *ж*; *прост.* биш бармаҡ, биш

**ПЯ́ТЕРО** *числ. собир.* бишәү, биш; **пя́теро дете́й** биш бала

**ПЯТЁРОЧНИК** *м* и **ПЯТЁРОЧНИЦА** *ж*; *разг.* бишкә генә уҡыусы

**ПЯТИ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "биш" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **пятигла́вый** биш башлы; **пятигра́нный** биш ҡырлы

**ПЯТИАЛТЫ́ННЫЙ** *м*; *уст.* ун биш тинлек (*аҡса*)

**ПЯТИБО́РЬЕ** *с*; *спорт.* пятиборье, биш төр ярыш; **ма́стер по пятибо́рью** биш төр ярыш буйынса мастер

**ПЯТИДЕСЯТИЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*промежуток времени*) илле йыл **2.** (*юбилей*) илле йыллыҡ; **отме́тить пятидесятиле́тие учёного** ғалимдың илле йыллығын билдәләү

**ПЯТИДЕСЯТИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) илле йыллыҡ **2.** (*о возрасте*) илле йәшлек

**ПЯТИДЕСЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* илленсе; **пятидеся́тые го́ды** илленсе йылдар

**ПЯТИДНЕ́ВКА** *ж*; *разг.* биш көнлөк; **объяви́ть пятидне́вку по убо́рке го́рода** ҡаланы йыйыштырыу буйынса биш көнлөк иғлан итеү

**ПЯТИДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое биш көнлөк, биш көн барған; **пятидне́вный похо́д** биш көнлөк поход

**ПЯТИКЛА́ССНИК** *м* и **ПЯТИКЛА́ССНИЦА** *ж* бишенсе синыф уҡыусыһы, бишенсе синыфта уҡыусы

**ПЯТИКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** биш тапҡыр, биш тапҡыр булған (ҡабатланған) **2.** (*увеличенный в пять раз*) бишләтә; **в пятикра́тном разме́ре** бишләтә арттырып

**ПЯТИКУ́РСНИК** *м* и **ПЯТИКУ́РСНИЦА** *ж* бишенсе курс студенты, бишенсе курста уҡыусы студент

**ПЯТИЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*промежуток времени*) биш йыл; **после́днее пятиле́тие** һуңғы биш йыл **2.** (*годовщина*) биш йыллыҡ

**ПЯТИЛЕ́ТКА** *ж* **1.** *см.* **пятиле́тие** 1; **2.** *ист.* (*пятилетний план развития народного хозяйства*) биш йыллыҡ; **пе́рвая пятиле́тка** беренсе биш йыллыҡ

**ПЯТИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) биш йыл(лыҡ); **пятиле́тний план** биш йыллыҡ план **2.** (*о возрасте*) биш йәшлек; **пятиле́тнее де́рево** биш йәшлек ағас

**ПЯТИМЕ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о сроке*) биш ай **2.** (*о возрасте*) биш айлыҡ; **пятиме́сячный ребёнок** биш айлыҡ бала

**ПЯТИМИНУ́ТКА** *ж*; *разг.* биш минутлыҡ (*кәңәшмә*)

**ПЯТИМИНУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое биш минут(лыҡ); **пятимину́тный разгово́р** биш минут һөйләшеү

**ПЯТИРУБЛЁВКА** *ж*; *разг.* биш һумлыҡ (*аҡса*)

**ПЯТИРУБЛЁВЫЙ,** -ая, -ое биш һумлыҡ

**ПЯТИСО́ТЕННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* биш йөҙ һумлыҡ

**ПЯТИСОТЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*промежуток времени*) биш йөҙ йыл **2.** (*годовщина*) биш йөҙ йыллыҡ

**ПЯТИСО́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* биш йөҙөнсө; **пятисо́тый но́мер** биш йөҙөнсө номер

**ПЯТИСТЕ́НКА** *ж* и **ПЯТИСТЕ́НОК** *м* алты мөйөшлө өй

**ПЯТИСТЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое алты мөйөшлө

**ПЯТИТО́НКА** *ж*; *разг.* биш тонналы машина

**ПЯТИТЫ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *числ.* биш меңенсе **2.** (*состоящий из пяти тысяч*) биш мең(лек), биш мең булған; **пятиты́сячный отря́д** биш меңлек отряд **3.** *разг.* (*о чём-л. стоимостью в пять тысяч*) биш мең торған, биш меңлек; **пятиты́сячный дом** биш меңлек йорт

**ПЯ́ТИТЬ** *несов. кого-что* сигендереү, артҡа шылдырыу

**ПЯ́ТИТЬСЯ** *несов.* **1.** сигенеү, сигеү, артҡа шылыу; **рак пя́тится наза́д** ҡыҫала артҡа сигә **2.** *перен., прост.* (*отступаться от чего-л.*) сигенеү, сигеү

**ПЯТИУГО́ЛЬНИК** *м* бишмөйөш

**ПЯТИЭТА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое биш ҡатлы; **пятиэта́жный дом** биш ҡатлы йорт

**ПЯ́ТКА** *ж* үксә; **поверну́ться на пя́тках** үксәләп боролоу ♦ **лиза́ть пя́тки** *см.* **лиза́ть**; **наступа́ть на пя́тки** артынан ҡалмау, эйәрә килеү; **показа́ть пя́тки** үксә күтәреү, табан ялтыратыу; ҡойроғон һыртҡа һалыу; **то́лько пя́тки сверка́ют** *см.* **сверка́ть**; **душа́ ушла́ в пя́тки** *см.* **душа́**

**ПЯТНА́ДЦАТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* ун бишенсе; **пятна́дцатый день** ун бишенсе көн

**ПЯТНА́ДЦАТЬ** *числ.* ун биш; **пятна́дцать рубле́й** ун биш һум

**ПЯТНА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** таплау, бысратыу; **пятна́ть ска́терть** ашъяулыҡты таплау **2.** *перен.* бысратыу, тап төшөрөү, ҡара яғыу; **пятна́ть себя́** үҙеңә тап төшөрөү

**ПЯТНА́ШКИ** *только мн.* әбәк (*балалар уйыны*)

**ПЯТНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое тимгелле, ала, сыбар, ала-сыбар; **пятни́стый оле́нь** ала-сыбар болан

**ПЯ́ТНИЦА** *ж* йома; **за́втра пя́тница** иртәгә йома ♦ **семь пя́тниц на неде́ле** бөгөн былай, иртәгә тегеләй (*тотороҡһоҙ*)

**ПЯ́ТНИЧНЫЙ,** -ая, -ое йома, йома ...ы

**ПЯТНО́** *с* **1.** тап, тимгел; (*у животных*) ҡашҡа; **лицо́ в пя́тнах** тимгелле бит; **белёсое пятно́**

аҡ тап **2.** (*запачканное место*) (ҡара) тап, бысраҡ; **са́льное пятно́** май табы; **выводи́ть пя́тна** таптарҙы бөтөрөү **3.** *перен.* (ҡара) тап, кер, гөнаһ; **смыть пятно́** гөнаһты юйыу ♦ **бе́лые пя́тна** аҡ таптар (*билдәһеҙ, тикшерелмәгән нәмәләр*); **жёлтое пятно́** *анат.* һары тап (*күҙ селтәренең күреүҙе тойоусы артҡы өлөшө*); **роди́мое пятно́** *см.* **роди́мый**; **тёмное (чёрное) пятно́** ҡара тап (*хур иткән, ояткә ҡалдырған нәмә*)

**ПЯТО́К** *м*; *разг.* (*пять одинаковых предметов*) биш (дана); **пято́к яиц** биш дана йомортҡа

**ПЯ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое үксә ...ы; **пя́точная кость** үксә һөйәге

**ПЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *числ.* бишенсе; **пя́тая страни́ца** бишенсе бит **2.** *в знач. сущ.* **пя́тая** *ж* биштән бер өлөш; **одна́ пя́тая населе́ния** халыҡтың биштән бер өлөшө ♦ **из пя́того в деся́тое**; **с пя́того на деся́тое (говори́ть, расска́зывать и т.п.)** урыҡ-һурыҡ һөйләү; унан башлап, бынан ташлап һөйләү

**ПЯТЬ 1.** *числ.* биш; **пять мину́т** биш минут **2.** биш, бишле; **ста́вить пять** биш ҡуйыу ♦ **без пяти́ мину́т** быҡа-быҡа, бик тиҙ, оҙаҡламай, тиҙҙән

**ПЯТЬДЕСЯ́Т** *числ.* илле; **пятьдеся́т рубле́й** илле һум

**ПЯТЬСО́Т** *числ.* биш йөҙ; **пятьсо́т ме́тров** биш йөҙ метр

**ПЯ́ТЬЮ** *нареч.* биш тапҡыр, биш ерҙә (урында); **пя́тью пять — два́дцать пять** биш бишең егерме биш

# Р

**РАБ** *м*; *прям.*, *перен.* ҡол; **сде́лать рабо́м** ҡол итеү; **раб мечта́ний** хыял ҡоло ♦ **раб бо́жий** *уст.*: 1) алла ҡоло, алла бәндәһе; 2) бәндә ҡоло

**РАБА́** *ж* **1.** ҡол (ҡатын-ҡыҙ), көң, ҡома **2.** *обычно чего*; *перен.* (*человек, полностью зависимый от кого-чего-л.*) ҡол; **раба́ любви́** мөхәббәт ҡоло

**РАБКО́Р** *м* (*рабочий корреспондент*) эшсе хәбәрсе

**РАБОВЛАДЕ́ЛЕЦ** *м* ҡол биләүсе

**РАБОВЛАДЕ́ЛЬЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ҡоллоҡ ...ы, ҡол биләүселек ...ы, ҡоллоҡҡа нигеҙләнгән; **рабовладе́льческое о́бщество** ҡол биләүселек йәмғиәте; **рабовладе́льческий строй** ҡол биләүселек ҡоролошо

**РАБОВЛАДЕ́НИЕ** *с* ҡол биләү, ҡол биләүселек; **эпо́ха рабовладе́ния** ҡол биләүселек дәүере

**РАБОЛЕ́ПИЕ** *с см.* **раболе́пствовать**; **раболе́пие пе́ред нача́льством** түрәләргә ялағайланыу

**РАБОЛЕ́ПНЫЙ,** -ая, -ое ҡолдарса баш эйгән, ялағайланған, ярарға (яраҡлашырға) тырышҡан, өлтөрәп торған, ялағай, ҡуштан; **раболе́пное отноше́ние** ҡуштан мөғәмәлә

**РАБОЛЕ́ПСТВО** *с см.* **раболе́пие**

**РАБОЛЕ́ПСТВОВАТЬ** *несов. перед кем-чем* ҡолдарса баш эйеү, ярарға тырышыу, ялағайланыу, теҙ сүгеү, ҡуштанланыу

**РАБО́ТА** *ж* **1.** *см.* **рабо́тать**; **рабо́та маши́ны** машинаның эшләүе; **рабо́та се́рдца** йөрәктең эшләүе **2.** *в разн. знач.* эш, хеҙмәт; **тру́дная рабо́та** ауыр хеҙмәт; **ме́лочная рабо́та** ваҡ эш; **обще́ственная рабо́та** йәмәғәт эше; **ме́сто рабо́ты** эш урыны; **пи́сьменная рабо́та** яҙма эш; **поступи́ть на рабо́ту** эшкә инеү; **увольня́ть с рабо́ты** эштән сығарыу; **принуди́тельная рабо́та** мәжбүри хеҙмәт; **у́мственная рабо́та** аҡыл хеҙмәте, баш эше **3.** (*продукт труда*) хеҙмәт, эш; **печа́тные рабо́ты** баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәр ♦ **взять в рабо́ту** ҡыҫмаҡҡа алыу; **рабо́та гори́т в рука́х** ҡулына күҙ эйәрмәй

**РАБО́ТАТЬ** *несов.*; *в разн. знач.* эшләү; **рабо́тать в саду́** баҡсала эшләү; **рабо́тать над дре́вними ру́кописями** боронғо ҡулъяҙмалар өҫтөндә эшләү; **рабо́тать со словарём** һүҙлек менән эшләү; **рабо́тать дире́ктором** директор булып эшләү; **заво́д рабо́тает** завод эшләй; **желу́док рабо́тает хорошо́** ашҡаҙан яҡшы эшләй; **библиоте́ка рабо́тает до восьми́ часо́в** китапхана сәғәт һигеҙгә тиклем эшләй ♦ **рабо́тать над собо́й** үҙ өҫтөндә эшләү

**РАБО́ТАТЬСЯ** *несов. безл.* эшләге килеү, эш барыу; **сего́дня хорошо́ рабо́тается** бөгөн эш яҡшы бара; **вчера́ не рабо́талось** кисә эш барманы

**РАБО́ТНИК** *м* **1.** хеҙмәткәр, эшсе; **нау́чный рабо́тник** ғилми хеҙмәткәр; **хоро́ший рабо́тник** яҡшы эшсе; **рабо́тник культу́ры** мәҙәниәт хеҙмәткәре **2.** *уст.* хеҙмәтсе, ялсы; **наня́ться в рабо́тники** хеҙмәтсе булып ялланыу

**РАБО́ТНИЦА** *ж* **1.** эшсе (эшләгән) ҡатын-ҡыҙ; **рабо́тница фа́брики** фабрикала эшләгән ҡатын-ҡыҙ **2.** *уст.* хеҙмәтсе, ялсы ♦ **дома́шняя рабо́тница** хеҙмәтсе ҡатын-ҡыҙ

**РАБОТОДА́ТЕЛЬ** *м* эш биреүсе, эшкә яллаусы

**РАБОТОРГО́ВЕЦ** *м* ҡол һатыусы, ҡолдар менән һатыу итеүсе

**РАБОТОРГО́ВЛЯ** *ж* ҡолдар менән һатыу итеү

**РАБОТОСПОСО́БНОСТЬ** *ж* эшкә һәләтлелек (яраҡлылыҡ, һәләтле булыу), эшкә һәләт; **облада́ть высо́кой работоспосо́бностью** эшкә юғары һәләтле булыу

**РАБОТОСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*трудоспособный*) эшкә һәләтле, эшкә булдыҡлы **2.** (*способный много работать*) эшкә уңған,

эшсән, ҡонар; **работоспосо́бный челове́к** эшкә уңған кеше

**РАБОТЯ́ГА** *м* и *ж*; *прост.* эшсән (тырыш) кеше

**РАБОТЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее *разг.* эшсән, эш һөйөүсән, булдыҡлы, егәрле, ҡонар, тырыш; **работя́щий па́рень** эшсән егет

**РАБО́ЧЕ-КРЕСТЬЯ́НСКИЙ,** -ая, -ое эшсе-крәҫтиән ...ы; **рабо́че-крестья́нская власть** эшсе-крәҫтиән хакимлығы

**РАБО́ЧИЙ I** *м* эшсе; **железнодоро́жный рабо́чий** тимер юл эшсеһе; **о́пытный рабо́чий** тәжрибәле эшсе; **сельскохозя́йственный рабо́чий** ауыл хужалығы эшсеһе

**РАБО́ЧИЙ II,** -ая, -ее **1.** эшсе, эшселәр ...ы; **рабо́чая молодёжь** эшсе йәштәр; **рабо́чее движе́ние** эшселәр хәрәкәте; **рабо́чий посёлок** эшселәр ҡасабаһы **2.** (*работающий*) эшләүсе; **рабо́чий челове́к** эшләүсе кеше **3.** (*о животных*) эшсе; **рабо́чие пчёлы** эшсе ҡорттар **4.** (*необходимый для работы*) эш ...ы; **рабо́чий инструме́нт** эш ҡоралы; **рабо́чее ме́сто** эш урыны; **рабо́чее вре́мя** эш сәғәте (ваҡыты) **5.** *тех.* эшләй торған ...ы; **рабо́чие ча́сти маши́ны** машинаның эшләй торған өлөштәре ♦ **в рабо́чем поря́дке** эш барышында; **рабо́чая си́ла** эшсе көсө; **рабо́чие ру́ки** эшсе ҡулдар; **рабо́чий день** эш көнө

**РАБСЕЛЬКО́Р** *м* (*рабочий и сельский корреспондент*) эшсе һәм ауыл хәбәрсеһе

**РА́БСКИЙ,** -ая, -ое **1.** ҡол(дар) ...ы, ауыр; **ра́бский труд** ҡол хеҙмәте, ауыр эш **2.** *перен.* ҡолдарса, ҡаршылыҡһыҙ, бер һүҙһеҙ; **ра́бское повинове́ние** ҡолдарса буйһоноу

**РА́БСТВО** *с* **1.** ҡоллоҡ, золмәт; **освободи́ться от ра́бства** ҡоллоҡтан ҡотолоу; **находи́ться в ра́бстве** ҡоллоҡта йәшәү; **эпо́ха ра́бства** ҡоллоҡ дәүере **2.** *перен.* бойондороҡло хәл, золом-йәбер, иҙгенлек, ҡол булыу; **быть в ра́бстве** иҙгенлектә булыу

**РАБФА́К** *м* (*рабочий факультет*) рабфак (*эшселәр факультеты*)

**РАБЫ́НЯ** *ж* ҡол (ҡатын-ҡыҙ), көң, ҡома

**РАВВИ́Н** *м* раввин (*йәһүдтәрҙә юғары дәрәжәле рухани, дини йәмғиәт башлығы*)

**РАВЕЛИ́Н** *м* равелин (*боронғо ҡәлғәләрҙә тыштан стена артына эшләнгән өҫтәмә нығытма*)

**РА́ВЕНСТВО** *с* **1.** тиңлек, бер тигеҙ булыу; **ра́венство сил** көстәрҙең бер тигеҙ булыуы **2.** *полит.*, *мат.* тигеҙлек; **социа́льное ра́венство** социаль тигеҙлек; **ра́венство дробе́й** кәсерҙәрҙең тигеҙлеге; **ра́венство многочле́нов** күпбыуындарҙың тигеҙлеге

**РАВНЕ́НИЕ** *с* тиңләшеү, тигеҙләнеү; **равне́ние на передовико́в** алдынғыларға тиңләшеү

**РАВНИ́НА** *ж* тигеҙлек, тигеҙ ер; **широ́кая равни́на** киң тигеҙлек

**РАВНИ́ННЫЙ,** -ая, -ое тигеҙлек ...ы, тигеҙ; **равни́нная ме́стность** тигеҙ урын

**РАВНО́ 1.** *нареч.* бер тигеҙ, бер төрлө, берҙәй; **равно́ краси́вые поля́ и луга́** берҙәй матур ҡырҙар һәм болондар **2.** *чему в знач. сказ.* тигеҙ, тигеҙ була; **четы́ре плюс два равно́ шести́** дүрткә икене ҡушһаң алтыға тигеҙ була **3.** *в знач. союза* (*так же*) кеүек үк, шулай уҡ

**РАВНО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "тигеҙ", "тиң" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **равноудалённый** тиң алыҫлыҡтағы

**РАВНОБЕ́ДРЕННЫЙ,** -ая, -ое *мат.* тигеҙ эргәле; **равнобе́дренный треуго́льник** тигеҙ эргәле өсмөйөш

**РАВНОВЕЛИ́КИЙ,** -ая, -ое *мат.* тигеҙ ҙурлыҡтағы; **равновели́кие углы́** тигеҙ ҙурлыҡтағы мөйөштәр; **равновели́кие фигу́ры** тигеҙ ҙурлыҡтағы фигуралар

**РАВНОВЕ́СИЕ** *с* **1.** тигеҙлек, тигеҙләнеш, тигеҙләнеү; **равнове́сие сил** көстәрҙең тигеҙлеге; **неусто́йчивое равнове́сие** тотороҡһоҙ тигеҙләнеш **2.** *перен.* (*спокойствие*) тыныслыҡ, тыныс хәл; **душе́вное равнове́сие** күңел тыныслығы ♦ **вы́вести из равнове́сия** сығырҙан сығарыу

**РАВНОДЕ́ЙСТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее берҙәй тәьҫир итеүсе; **равноде́йствующая си́ла** *физ.* берҙәй тәьҫир итеүсе көс

**РАВНОДЕ́НСТВИЕ** *с* көн менән төндөң тигеҙлеге; **весе́ннее равноде́нствие** яҙғы көн менән төндөң тигеҙлеге; **осе́ннее равноде́нствие** көҙгө көн менән төндөң тигеҙлеге

**РАВНОДУ́ШИЕ** *с* **1.** (*безразличное, безучастное отношение*) вайымһыҙлыҡ, ғәмһеҙлек, моңһоҙлоҡ, битарафлыҡ; **проявля́ть равноду́шие** вайымһыҙлыҡ күрһәтеү **2.** (*отсутствие интереса, влечения к кому-чему-л.*) битарафлыҡ, ҡыҙыҡһынмау, иғтибарһыҙлыҡ

**РАВНОДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*безучастный, безразличный*) вайымһыҙ, ғәмһеҙ; **равноду́шный взгляд** ғәмһеҙ ҡараш; **равноду́шный челове́к** вайымһыҙ кеше **2.** (*не испытывающий интереса*) иҫе китмәгән, ҡыҙыҡһынмаған, битараф, ихлас (әүәҫ) түгел, моңһоҙ, бошмаҫ **3.** *разг.* (*не испытывающий влюблённости*) мөхәббәт хисе булмаған, күңеле тартмаған

**РАВНОЗНА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тиң, бер төрлө (иш), тиң мәғәнәле (дәрәжәле, ҡиммәтле, әһәмиәтле); **равнозна́чные собы́тия** бер иш ваҡиғалар; **равнозна́чные величи́ны** тиң ҡиммәтле дәүмәлдәр

**РАВНОМЕ́РНОСТЬ** *ж* тигеҙ булыу, (бер) тигеҙлек, бер төрлөлөк

**РАВНОМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое (бер) тигеҙ, бер төрлө; **равноме́рное разви́тие** бер тигеҙ үҫеш; **равноме́рная ско́рость** бер төрлө тиҙлек

**РАВНОПРА́ВИЕ** *с* тиң хоҡуҡлылыҡ, хоҡуҡ тиңлеге; **равнопра́вие гра́ждан** граждандарҙың тиң хоҡуҡлылығы

**РАВНОПРА́ВНЫЙ,** -ая, -ое тиң хоҡуҡлы; **равнопра́вный догово́р** тиң хоҡуҡлы килешеү

**РАВНОСИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тиң (тигеҙ) көслө, көстәре тиң; **равноси́льные а́рмии** көстәре тиң армиялар **2.** (*подобный чему-л.*) тиң; **собы́тие, равноси́льное катастро́фе** һәләкәткә тиң ваҡиға

**РАВНОСТОРО́ННИЙ,** -яя, -ее *мат.* тигеҙ яҡлы; **равносторо́нний треуго́льник** тигеҙ яҡлы өсмөйөш

**РАВНОУГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *мат.* тигеҙ мөйөшлө; **равноуго́льный многоуго́льник** тигеҙ яҡлы күпмөйөш

**РАВНОЦЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*одинаковый по цене, по стоимости*) бер (үк) хаҡтағы, хаҡтары бер; **равноце́нные това́ры** бер хаҡтағы тауарҙар **2.** (*одинаковый по ценности, по качеству*) бер-бере(һе)нә тиң, бәрәбәр, бер иш (төрлө), бер үк сифатлы, тиң ҡиммәтле; **равноце́нные рабо́тники** бер-беренә тиң хеҙмәткәрҙәр

**РА́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тигеҙ, тиң; **ра́вные си́лы** тигеҙ көстәр; **ра́вные величи́ны** тигеҙ дәүмәлдәр **2.** тиң, тиңдәш; **относи́ться как к ра́вному** тиң итеп ҡарау **3.** (*равняющийся*) тигеҙ булған; **расстоя́ние, ра́вное пяти́ ме́трам** биш метрға тигеҙ булған ара ♦ **ра́вным о́бразом** шулай уҡ

**РАВНЯ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** тигеҙләү, тиңләү, тиңләштереү **2.** (*считать равным*) тиң ҡуйыу, тигеҙ ҡарау (күреү); **равня́ть с собо́й** үҙе менән тиң ҡуйыу

**РАВНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** тиңләшеү; **равня́ться на передовико́в** алдынғыларға тиңләшеү **2.** тигеҙләнеү; **равня́ться по правофланго́вому** уң флангылағыға ҡарап тигеҙләнеү **3.** тигеҙ булыу; **два́жды два равня́ется четырём** ике икең дүрт була

**РАГУ́** *с нескл.* рагу (*ашамлыҡ*)

**РАД,** -а, -о *в знач. сказ.* **1.** *кому-чему* шат; **я за вас о́чень рад** мин һеҙҙең өсөн бик шат **2.** *с неопр.* (*о готовности что-л. сделать*) әҙер, риза, ине лә; **рад вам помо́чь** һеҙгә ярҙам итергә әҙермен ♦ **рад стара́ться**: 1) *уст.* хеҙмәт итергә әҙермен; 2) була ул, булдырабыҙ уны (*башҡарырға әҙерлекте белдерә*); **рад-радёхонек**; **рад-радёшенек** ҡыуанып бөтә алмай, бик шат

**РАДА́Р** *м* радар

**РАДА́РНЫЙ,** -ая, -ое радар, радар ...ы; **рада́рная ста́нция** радар станцияһы; **рада́рное обору́дование** радар ҡорамалдары

**РАДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **раде́ть 2.** *рел.* табыныу (*ҡайһы бер мәҙһәптәрҙә йыр, бейеүҙән торған, фанатик рәүештә үҙ-үҙеңде онотоп башҡарылған йола*)

**РАДЕ́ТЕЛЬ** *м*; *уст.* булышсы, ярҙамсы, ҡайғыртыусы, тырышлыҡ (хәстәрлек) итеүсе (күреүсе)

**РАДЕ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* тырыш, ҡайғыртыусан, хәстәрле

**РАДЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *о ком-чём*; *уст.* ҡайғыртыу, хәстәрләү, тырышыу; **раде́ть о де́ле** эш өсөн тырышыу **2.** *рел.* (*совершать радение*) табыныу йолаһы башҡарыу

**РАДЖА́** *м* раджа (*Һиндостанда кенәзлек титулы һәм шул титулдағы кеше*)

**РА́ДИ** *предлог с род. п.*; *в разн. знач.* өсөн, хаҡына, хаҡы өсөн; **ра́ди о́бщего де́ла** дөйөм эш хаҡына; **ра́ди тебя́** һинең хаҡыңа; **ра́ди шу́тки** ҡыҙыҡ өсөн ♦ **ра́ди бо́га** алла хаҡы өсөн

**РАДИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое радиаль (*радиус буйлап йүнәлгән*); **радиа́льный проспе́кт** радиаль проспект

**РАДИА́ТОР** *м* радиатор (**1.** *эске яныулы двигателдәрҙә моторҙы һыуытыу аппараты* **2.** *үҙәкләштерелгән йылытыу системаһында йылытыу приборы*); **радиа́тор самолёта** самолёт радиаторы; **радиа́тор парово́го отопле́ния** пар менән йылытыу радиаторы

**РАДИАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое радиация ...ы

**РАДИА́ЦИЯ** *ж* радиация, нурланыш (*электромагнит энергияһын сәсеү*); **со́лнечная радиа́ция** ҡояш радиацияһы

**РА́ДИЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** радий ...ы; **ра́диевое излуче́ние** радий нурҙары **2.** радийлы; **ра́диевая руда́** радийлы мәғдән

**РА́ДИЙ** *м* радий (*радиоактив химик элемент, металл*)

**РАДИКА́Л I** *м* радикал (**1.** *киҫкен саралар яҡлы кеше* **2.** *сәйәс. радикализм яҡлы кеше*)

**РАДИКА́Л II** *м* радикал (**1.** *математикала тамға* **2.** *бер химик ҡушылманан икенсеһенә үҙгәрмәй күсә торған атомдар төркөмө*)

**РАДИКАЛИ́ЗМ** *м* радикаллек (**1.** *киҫкен саралар үткәреү* **2.** *сәйәс. буржуаз дәүләт мәнфәғәттәренән сығып демократик реформалар үткәреүҙе талап итеүсе сәйәси йүнәлеш*)

**РАДИКА́ЛЬНОСТЬ** *ж* радикаллек, киҫкенлек, ҡәтғилек; **радика́льность взгля́дов** ҡараштарҙың киҫкенлеге

**РАДИКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое радикаль, киҫкен, ҡәтғи, тәрән; **радика́льные ме́ры** киҫкен саралар; **радика́льные измене́ния** радикаль үҙгәрештәр

**РАДИКУЛИ́Т** *м*; *мед.* радикулит, бил биртенеү

**РА́ДИО** *с нескл.*; *в разн. знач.* радио; **включи́ть ра́дио** радио тоташтырыу; **слу́шать ра́дио** радио тыңлау

**РАДИО... I** *ҡушма һүҙҙәрҙең "радио" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **радиокружо́к** радиотүңәрәк; **радиоко́мпас** радиокомпас

**РАДИО... II** *ҡушма һүҙҙәрҙең "радий", "радиоактивлыҡ", "радиация" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **радиоэлеме́нт** радиоэлемент (*радиоактив элемент*); **радиоме́тр** радиометр (*радиацияның көсөн йәки нурланыш*

*энергияһының йылылыҡ энергияһына әҙерелеҙен күрһәтә торған прибор*)

**РАДИОАКТИ́ВНОСТЬ** *ж* радиоактивлыҡ; **есте́ственная радиоакти́вность** тәбиғи радиоактивлыҡ; **иску́сственная радиоакти́вность** яһалма радиоактивлыҡ; **радиоакти́вность ура́на** урандың радиоактивлығы

**РАДИОАКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое радиоактив; **радиоакти́вное излуче́ние** радиоактив нурланыш; **радиоакти́вный распа́д** радиоактив тарҡалыш

**РАДИОАППАРАТУ́РА** *ж* радиоаппаратура

**РАДИОАСТРОНО́МИЯ** *ж* радиоастрономия (*йыһан объекттарын улар ебәргән радиотулҡындар аша өйрәнеүсе астрономия фәне*)

**РАДИОБИОЛО́ГИЯ** *ж* радиобиология (*радиоактив нурланыштың организмға булған тәьҫирен өйрәнеүсе фән*)

**РАДИОВЕЩА́НИЕ** *с* радио тапшырыу

**РАДИОВЕЩА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое радио тапшырыу ...ы; **радиовеща́тельная ста́нция** радио тапшырыу станцияһы

**РАДИОВОЛНА́** *ж*; *физ.* радиотулҡын (*радио аша тапшырыу ваҡытында арауыҡҡа тарала торған электромагнит тулҡындар*)

**РАДИОГРА́ММА** *ж* радиограмма (*радиотелеграфтан тапшырылған хәбәр*); **дать радиогра́мму** радиограмма биреү

**РАДИОГРА́ФИЯ** *ж* радиография (*үтә күренмәй торған нәмәләр аша рентген нурҙары ярҙамында һүрәткә төшөрөү*)

**РАДИОЗО́НД** *м* радиозонд (*атмосфераның юғары ҡатламдарынан һауа торошо тураһында сигналдар ебәреп тора торған метеререологик прибор*)

**РАДИОКОММЕНТА́ТОР** *м* радиокомментатор

**РАДИО́ЛА** *ж* радиола (*радиоалғыстан һәм музыка уйнатҡыстан торған аппарат*)

**РАДИОЛА́МПА** *ж* радиолампа (*радиоаппаратҡа ҡуйыла торған махсус лампа*)

**РАДИО́ЛОГ** *м* радиолог (**1.** *радиология белгесе* **2.** *дауалауҙа радиоактив матдәләрҙе файҙаланыусы врач*)

**РАДИОЛО́ГИЯ** *ж* радиология (*радий һәм башҡа радиоактив элементтарҙың тәьҫирен һәм уларҙы файҙаланыу юлдарын өйрәнә торған фән*)

**РАДИОЛОКА́ТОР** *м* радиолокатор (*радиотулҡындар ярҙамында ниндәй ҙә булһа берәй объекттың торған урынын билдәләй торған аппарат*)

**РАДИОЛОКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое радиолокация ...ы, радиолокацион; **радиолокацио́нная ста́нция** радиолокация станцияһы

**РАДИОЛОКА́ЦИЯ** *ж* радиолокация (*радиотулҡындар ярҙамында төрлө объекттарҙың алыҫлығын һәм йүнәлешен билдәләү, шулай уҡ ошо билдәләү ысулдарын өйрәнә торған фән һәм техника өлкәһе*)

**РАДИОЛЮБИ́ТЕЛЬ** *м* радиоһәүәҫкәр; **соревнова́ния радиолюби́телей** радиоһәүәҫкәрҙәр ярышы

**РАДИОМАЯ́К** *м* радиомаяҡ (*ерҙән тороп караптарҙың һәм самолёттарҙың хәрәкәт итеү урындарын билдәләү өсөн сигналдар биреүсе радиостанция*); **сигна́лы радиомаяка́** радиомаяҡ сигналдары

**РАДИОНАВИГА́ЦИЯ** *ж* радионавигация (*самолёт һәм караптарҙы радиотехник саралар ярҙамында йөрөтөү*)

**РАДИООБОРУ́ДОВАНИЕ** *с* радиойыһаз

**РАДИОПЕЛЕНГА́ТОР** *м* радиопеленгатор

**РАДИОПЕЛЕНГА́ЦИЯ** *ж* радиопеленгация

**РАДИОПЕРЕДА́ТЧИК** *м* радиотапшырғыс

**РАДИОПЕРЕДА́ЧА** *ж*; *в разн. знач.* радиотапшырыу; **систе́ма радиопереда́чи** радиотапшырыу системаһы; **слу́шать радиопереда́чу** радиотапшырыу тыңлау

**РАДИОПЕРЕКЛИ́ЧКА** *ж* радио аша һөйләшеү (хәбәрләшеү); **радиоперекли́чка городо́в** ҡалаларҙың радио аша һөйләшеүе

**РАДИОПОСТАНО́ВКА** *ж* радиопостановка (*радио аша тапшырылған спектакль*); **слу́шать радиопостано́вку** радиопостановка тыңлау

**РАДИОПРИЁМНИК** *м* радиоалғыс; **батаре́йный радиоприёмник** батареялы радиоалғыс; **транзи́сторный радиоприёмник** транзисторлы радиоалғыс

**РАДИОПРИЁМНЫЙ,** -ая, -ое радиотулҡын ҡабул итеүсе; **радиоприёмная устано́вка** радиотулҡын ҡабул итеүсе йайланма

**РАДИОРЕПОРТА́Ж** *м* радиорепортаж (*урындағы хәлде туранан-тура радио аша тапшырыу*)

**РАДИОРЕПОРТЁР** *м* радиорепортёр; **рабо́тать радиорепортёром** радиорепортёр булып эшләү

**РАДИОРУ́БКА** *ж* радиорубка (*карапта, самолётта радистың һәм радиоаппаратура бүлмәһе*)

**РАДИОРУ́ПОР** *м* радиорупор (*рупор формаһындағы репродуктор*)

**РАДИОСВЯ́ЗЬ** *ж* радиоэлемтә; **держа́ть радиосвя́зь** радиоэлемтә тотоу

**РАДИОСЕ́ТЬ** *ж* радиоселтәр

**РАДИОСИГНА́Л** *м* радиосигнал

**РАДИОСЛУ́ШАТЕЛЬ** *м* радио тыңлаусы

**РАДИОСТА́НЦИЯ** *ж* радиостанция, радио станцияһы

**РАДИОСТУ́ДИЯ** *ж* радиостудия, радио студияһы

**РАДИОТЕЛЕГРА́ММА** *ж* радиотелеграмма

**РАДИОТЕЛЕГРА́Ф** *м* радиотелеграф

**РАДИОТЕЛЕГРА́ФНЫЙ,** -ая, -ое радиотелеграф ...ы; **радиотелегра́фная связь** радиотелеграф элемтәһе

**РАДИОТЕЛЕМЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое радиотелеметрик; **радиотелеметри́ческая систе́ма** радиотелеметрик система

**РАДИОТЕЛЕМЕТРИ́Я** *ж* радиотелеметрия (*төрлө дәүмәлдәрҙе алыҫтан үлсәп, һөҙөмтәләрен радио ярҙамында тапшырыу*)

**РАДИОТЕЛЕСКО́П** *м* радиотелескоп

**РАДИОТЕЛЕУПРАВЛЕ́НИЕ** *с* радиотелеидара

**РАДИОТЕЛЕФО́Н** *м* радиотелефон

**РАДИОТЕЛЕФО́ННЫЙ,** -ая, -ое радиотелефон ...ы; **радиотелефо́нная связь** радиотелефон элемтәһе

**РАДИОТЕРАПИ́Я** *ж* радиотерапия (*радиоактив матдәләр ярҙамында дауалау*)

**РАДИОТЕ́ХНИК** *м* радиотехник (*радиотехника белгесе*)

**РАДИОТЕ́ХНИКА** *ж* радиотехника (**1.** *юғары йышлыҡтағы электромагнит тулҡындарҙы төрлө өлкәләрҙә файҙаланыу ысулдарын өйрәнгән фән* **2.** *радиоаппаратуралар уйлап сығарыу һәм уны етештереүҙе ғәмәлгә ашырған техника тармағы*)

**РАДИОТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое радиотехник; **радиотехни́ческое сооруже́ние** радиотехник ҡоролма

**РАДИОТО́ЧКА** *ж* радионөктә; **установи́ть радиото́чку** радионөктә ҡуйыу

**РАДИОУ́ЗЕЛ** *м* радиоузел (*радио аша тапшырыу алып барған урын*)

**РАДИОФИ́ЗИКА** *ж* радиофизика (*радиотехниканың физик нигеҙҙәрен өйрәнеү бүлеге*)

**РАДИОФИКА́ЦИЯ** *ж* радиофикациялау, радиолаштырыу; **сплошна́я радиофика́ция страны́** илде тотош радиолаштырыу; **радиофика́ция заво́да** заводты радиолаштырыу

**РАДИОФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* радиолаштырыу, радио үткәреү; **радиофици́ровать дере́вню** ауылды радиолаштырыу; **радиофици́ровать шко́лу** мәктәпкә радио үткәреү

**РАДИОФИЦИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* радиолашыу **2.** *несов. страд. от* **радиофици́ровать**

**РАДИОЦЕ́НТР** *м* радио үҙәге

**РАДИОЭЛЕКТРО́НИКА** *ж* радиоэлектроника (*радиотехниканан һәм электрониканан үҫеп сыҡҡан айырым фән тармағы*)

**РАДИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* радио аша хәбәр итеү (биреү); **ради́ровать в центр** үҙәккә радио аша хәбәр итеү

**РАДИ́СТ** *м* радист

**РА́ДИУС** *м* радиус (**1.** *мат. түңәрәк йәки шар әйләнәһенең бер нөктәһен үҙәге менән тоташтырған һыҙыҡ һәм шул һыҙыҡтың оҙонлоғо* **2.** *күсм. берәй нәмәнең таралыу, хәрәкәт итеү өлкәһе*)

**РА́ДОВАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* шатландырыу, ҡыуандырыу, һөйөндөрөү; **ра́довать друзе́й** дуҫтарҙы шатландырыу **2.** (*быть приятным для взора, слуха и т.д.*) матур күренеү, иркәләү, шатлыҡ (рәхәтлек) биреү; **ра́довать ду́шу** күңелгә шатлыҡ биреү

**РА́ДОВАТЬСЯ** *несов.* шатланыу, ҡыуаныу, һөйөнөү; **ра́доваться успе́хам** уңыштарға шатланыу

**РАДО́Н** *м* радон (*радиоактив химик элемент, газ*)

**РАДО́НОВЫЙ,** -ая, -ое радон ...ы; **радо́новая ва́нна** радон ваннаһы

**РА́ДОСТНЫЙ,** -ая, -ое шатлыҡ кисергән, шатлыҡлы, шат, ҡыуаныс кисергән, ҡыуаныслы, күңелле, һөйөнөслө; **ра́достные изве́стия** һөйөнөслө хәбәрҙәр; **ра́достное лицо́** шат йөҙ

**РА́ДОСТЬ** *ж* шатлыҡ, ҡыуаныс, һөйөнөс; **больша́я ра́дость** ҙур шатлыҡ; **приноси́ть ра́дость** һөйөнөс килтереү ♦ **с ра́достью** ҡыуанып, һөйөнөп, шатланып; **на ра́достях** шатлыҡтан, ҡыуаныстан

**РА́ДУГА** *ж* йәйғор; **появле́ние ра́дуги** йәйғор ҡалҡыу

**РА́ДУЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йәйғор төҫлө (төҫөндәге), йәйғор ...ы, аллы-гөллө; **ра́дужные цвета́** йәйғор төҫтәре **2.** *перен.* шатлыҡ (ҡыуаныс) килтергән, шатлыҡлы, ҡыуаныслы, һөйөнөслө, күңелле; **ра́дужные мечты́** күңелле хыялдар ♦ **ра́дужная оболо́чка** *анат.* күҙҙең төҫлө шекәрәһе

**РАДУ́ШИЕ** *с* алсаҡлыҡ, асыҡ йөҙлөлөк, илгәҙәклек, киң күңеллелек, яҡты сырайлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ; **показа́ть раду́шие** алсаҡлыҡ күрһәтеү

**РАДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое алсаҡ, киң күңелле, асыҡ йөҙ(лө), яҡты сырай(лы), ҡунаҡсыл, илгәҙәк; **раду́шный челове́к** илгәҙәк кеше; **встреча́ть с раду́шным выраже́нием лица́** яҡты сырай менән ҡаршы алыу

**РАЁК** *м* раёк (*ҙурайтҡыс быяла аша рәсемдәр ҡуйып күрһәтә торған тартма*)

**РАЁШНИК** *м* раёксы (*раёк күрһәтеүсе*)

**РАЖ** *м*; *разг.* шашҡанлыҡ, ҡыҙғанлыҡ, сама-нан тыш ғәйрәтлелек, ярһыу, ҡыҙыу; **войти́ в раж** ҡыҙып китеү

**РАЗ I** *м* **1.** ҡабат, ҡат, тапҡыр, мәртәбә, рәт, ҡайтара; **оди́н раз** бер ҡабат; **три ра́за** өс мәртәбә; **мно́го раз** күп тапҡыр; **пять раз сказа́ть** биш ҡат әйтеү; **не́сколько раз** бер нисә рәт; **два ра́за поклони́ться** ике ҡайтара баш эйеү **2.** осраҡ, ваҡыт, юл(ы); **вся́кий раз** һәр ваҡыт; **в э́тот раз** был юлы **3.** (*при счёте*) бер, берәү; **раз, два, три** бер, ике, өс ♦ **ра́з-два́ и гото́во** бик тиҙ; **ра́з-два́ и обчёлся** бармаҡ менән һанарлыҡ; **раз за ра́зом** бер-бер артлы; **раз (и) навсегда́** мәңгегә, ҡабатланмаҫлыҡ итеп; **раз от ра́зу** ҡабатланған һайын, әлдән-әле; **раз плю́нуть** *кому* бер ни тормай; **в са́мый раз**; **как раз** тап-таман; **вот те (тебе́) ра́з** бына һиңә кәрәк булһа; **друго́й**

**(ино́й) раз** башҡа (ҡайһы) ваҡытта; **не раз** бер нисә тапҡыр

**РАЗ II** *нареч.* бер ваҡыт (мәл, саҡ, көнө); **раз по́здно ве́чером** бер көнө кискеһен; **ка́к-то раз** бер ваҡыт шулай

**РАЗ III** *союз*; *разг.* -ғас/-гәс, икән; **раз он не пришёл, я то́же не пое́ду** ул килмәгәс, мин дә бармайым

**РАЗ...** **(разо..., разъ..., рас...)** *приставка* **1.** *ҡылым яһағанда ҡулланылып, түбәндәге мәғәнәләрҙе аңлата*: 1) *өлөштәргә бүлеүҙе, мәҫ.*, **разби́ть** ярыу, ватыу; 2) *эш-хәрәкәт йәки хәлде көсәйтеүҙе, мәҫ.*, **разукра́сить** ныҡ биҙәү; 3) *эш-хәрәкәттең төрлө яҡҡа йүнәлеүен, мәҫ.*, **разбежа́ться** йүгереп таралышыу; 4) *эш-хәрәкәттең туҡталыуын, мәҫ.*, **разду́мать** кире уйлау, дүнеү; 5) *киреһенсә эшләүҙе, мәҫ.*, **разбинтова́ть** бинтты тағатыу (сисеү) **2.** *сифат һәм исем яһағанда ҡулланылып, "бик", "үтә", "артыҡ" тигәнде аңлата, мәҫ.*, **развесёлый** үтә шат; **разлюбе́зный** артыҡ илгәҙәк

**РАЗАГИТИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*убедить*) өгөтләп күндереү **2.** (*отговорить*) өгөтләп дүндереү, кире уйлатыу

**РАЗА́ХАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ах итә башлау, ахвах итеү

**РАЗБАВИ́ТЕЛЬ** *м*; *спец.* шыйыҡлағыс

**РАЗБА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *что* шыйыҡайтыу, шыйыҡлау, һыу ҡушыу (өҫтәү); **разба́вить молоко́ водо́й** һөткә һыу ҡушыу; **разба́вить спирт** спиртҡа һыу өҫтәү **2.** *перен.*, *разг.* (*присоединить, примешать, привнести что-л. постороннее*) ҡушып (болғап, өҫтәп) ебәреү

**РАЗБА́ВКА** *ж*; *разг.* шыйыҡлау

**РАЗБАВЛЕ́НИЕ** *с см.* **разба́вить — разбавля́ть**

**РАЗБАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **разба́вить**

**РАЗБАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **разбавля́ть**

**РАЗБАЗА́РИВАНИЕ** *с*; *разг. см.* **разбаза́рить**

**РАЗБАЗА́РИВАТЬ** *несов. см.* **разбаза́рить**

**РАЗБАЗА́РИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **разбаза́ривать**

**РАЗБАЗА́РИТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** әрәмшәрәм итеү, бушҡа туҙҙырып бөтөрөү **2.** *перен.* бушҡа сарыф итеү (*ваҡытты, талантты*)

**РАЗБА́ЛИВАТЬСЯ I** *несов. см.* **разболе́ться** I

**РАЗБА́ЛИВАТЬСЯ II** *несов. см.* **разболе́ться** II

**РАЗБАЛОВА́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* артыҡ иркәләү, иркәләтеп боҙоу

**РАЗБАЛОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* артыҡ иркәләнеү (иркәләнеп китеү), боҙолоу

**РАЗБА́ЛТЫВАТЬ I** *несов. см.* **разболта́ть** I

**РАЗБА́ЛТЫВАТЬ II** *несов. см.* **разболта́ть** II

**РАЗБА́ЛТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разболта́ться** I; **2.** *страд. от* **разба́лтывать** I

**РАЗБЕ́Г** *м см.* **разбежа́ться** 2; **пры́гнуть с разбе́га** йүгереп килеп һикереү

**РАЗБЕ́ГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* йүгерә башлау, йүгерешә башлау

**РАЗБЕГА́ТЬСЯ** *несов. см.* **разбежа́ться** ♦ **глаза́ разбега́ются** күҙҙәр йүгерә

**РАЗБЕЖА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йүгереп таралышыу, төрлө яҡҡа йүгерешеп китеү, тырым-тырағай ҡасыу; **де́ти разбежа́лись** балалар йүгереп таралышты **2.** йүгереп килеп (*тиҙлек алыр өсөн*); **разбежа́вшись, перескочи́ть ров** йүгереп килеп соҡорҙо аша һикереү **3.** *перен.* йүгереү, уйнау, аларыу (*күҙгә ҡарата*) ♦ **глаза́ разбежа́лись** күҙҙәр йүгерә

**РАЗБЕРЕДИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ауырттырыу, ярһытыу, ҡуҙғытыу (*яраны, ауыртҡан ерҙе*); **разбереди́ть ра́ну** яраны ярһытыу **2.** *перен.* ярһытыу, әрнетеү, әсендереү; **разбереди́ть ду́шу** йөрәкте ярһытыу

**РАЗБИВА́ТЬ** *несов. см.* **разби́ть**

**РАЗБИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разби́ться** **2.** *страд. от* **разбива́ть**

**РАЗБИ́ВКА** *ж* **1.** *см.* **разби́ть — разбива́ть**; **разби́вка льда** боҙҙо ватыу; **разби́вка цветника́** сәскәлек яһау; **разби́вка ла́геря** лагерь ҡороу **2.** (*планировка*) планлаштырыу, билдәләп сығыу; **разби́вка но́вой у́лицы** яңы урамды планлаштырыу

**РАЗБИНТОВА́ТЬ** *сов. кого-что* бинтын сисеү (тағатыу); **разбинтова́ть ру́ку** ҡулдың бинтын сисеү

**РАЗБИНТОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** үҙ бинтыңды сисеү (тағатыу) **2.** бинты сиселеү (тағатылыу); **рука́ разбинтова́лась** ҡулдың бинты сиселде

**РАЗБИНТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **разбинтова́ть**

**РАЗБИНТО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разбинтова́ться** **2.** *страд. от* **разбинто́вывать**

**РАЗБИРА́ТЕЛЬСТВО** *с* **1.** ҡарау, тикшереү **2.** *юр.* эште ҡарау; **суде́бное разбира́тельство** эште судта ҡарау

**РАЗБИРА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **разобра́ть** **2.** *кого-что* и *без доп.*; *разг.* ҡарау, ҡарап (айырып, һайлап) алыу; **брать всё не разбира́я** ҡарап тормай, барыһын да алыу

**РАЗБИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разобра́ться** **2.** (*быть разборным*) һүтелеү, һүтелә торған булыу; **э́тот аппара́т разбира́ется** был аппарат һүтелә **3.** *страд. от* **разбира́ть**

**РАЗБИТНО́Й,** -ая, -ое *разг.* үткер, сос, етеҙ, шаян; **разбитно́й ма́лый** үткер егет

**РАЗБИ́ТОСТЬ** *ж* арығанлыҡ, хәлһеҙлек; **чу́вствовать разби́тость** арығанлыҡ һиҙеү

**РАЗБИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разби́ть**; **разби́тый параличо́м** паралич һуҡҡан **2.** *прил.* (*расколотый*) ватыҡ, ярыҡ; **разби́тая ча́шка** ярыҡ сынаяҡ; **разби́тое окно́** ватыҡ тәҙрә **3.** *прил.* (*повреждённый*) боҙоҡ, ватыҡ, емере-

леп бөткән; **разби́тая маши́на** ватыҡ машина **4.** *прил.* ауыртҡан, һынған, яраланған; **разби́тая рука́** яраланған ҡул **5.** *прил.* емерелгән, юҡҡа сыҡҡан; **разби́тые наде́жды** юҡҡа сыҡҡан өмөттәр **6.** *прил.* тар-мар ителгән, еңелгән, ҡыйратылған; **разби́тый враг** ҡыйратылған дошман **7.** *прил.* (*усталый*) ныҡ арыған, хәлһеҙләнгән, ҡаҡшаған, ҡыйралған; **чу́вствовать себя́ разби́тым** үҙеңде ҡыйралған кеүек һиҙеү ♦ **оказа́ться у разби́того коры́та** бер ниһеҙ тороп ҡалыу

**РАЗБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ватыу, ярыу, ҡыйратыу, сайратыу; **разби́ть стекло́** быяла ярыу; **бу́рей разби́ло кора́бль** *безл.* дауыл карапты ҡыйратты **2.** яралау, ярыу; **разби́ть го́лову** башты ярыу **3.** боҙоу, ватыу, емереү; **разби́ть роя́ль** роялде боҙоу; **разби́ть маши́ну** машинаны ватыу **4.** тар-мар итеү, ҡыйратыу; **разби́ть врага́** дошманды тар-мар итеү **5.** айырыу, бүлгеләү; **разби́ть по́ле на уча́стки** баҫыуҙы участкаларға бүлгеләү **6.** *разг.* юҡҡа сығарыу, өҙөү; **разби́ть наде́жды** өмөттәрҙе юҡҡа сығарыу; **разби́ть сде́лку** килешеүҙе өҙөү **7.** яһау, эшләү; **разби́ть сад** баҡса эшләү **8.** ҡороу; **разби́ть ла́герь** лагерь ҡороу **9.** *типогр.* аралау, киңәйтеү; **разби́ть стро́ки** юл араларын киңәйтеү **10.** *кого* һуғыу, эштән сығарыу, зарарлау; **его́ разби́л парали́ч** уны паралич һуҡҡан

**РАЗБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ватылыу, ярылыу; **стака́н разби́лся** стакан ватылды **2.** ауырттырыу, яраланыу, имгәнеү; **разби́ться при паде́нии** йығылып (ҡолап) яраланыу **3.** *разг.* юҡҡа сығыу, емерелеү, ҡыйрау; **теле́га разби́лась** арба ҡыйраны **4.** бүленеү; **разби́ться на отря́ды** отрядтарға бүленеү

**РАЗБЛОКИ́РОВАТЬ** *сов. что* ҡамауҙы алыу, ҡамауҙы туҡтатыу; **разблоки́ровать порт** портты ҡамауҙы туҡтатыу

**РАЗБОГАТЕ́ТЬ** *сов.* байыу, байығыу, байып китеү

**РАЗБО́Й** *м* юл баҫыу, талау

**РАЗБО́ЙНИК** *м* и **РАЗБО́ЙНИЦА** *ж* **1.** юлбаҫар; **атама́н разбо́йников** юлбаҫарҙар атаманы **2.** *разг.*, *бран.* талаусы, башкиҫәр **3.** *разг.*, *шутл.* шуҡ, шаян

**РАЗБО́ЙНИЧАТЬ** *несов.* талау, юлбаҫарлыҡ итеү

**РАЗБО́ЙНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое и **РАЗБО́ЙНИЧИЙ,** -ья, -ье юлбаҫар(ҙар) ...ы, юлбаҫарлыҡ ...ы, юлбаҫарҙарса; **разбо́йническое нападе́ние** юлбаҫарҙарса һөжүм итеү; **разбо́йничья ша́йка** юлбаҫарҙар өйөрө

**РАЗБО́ЙНИЧЕСТВО** *с* юлбаҫарлыҡ

**РАЗБОЛЕ́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* (*о человеке*) ныҡ (сәсрәп) ауырып китеү; **он совсе́м разболе́лся** ул бөтөнләй ауырып китте

**РАЗБОЛЕ́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* (*о какой-л. части тела*) һыҙлау, ауыртыу, һыҙлай (ауырта) башлау (китеү); **разболе́лась голова́** баш ауырта башланы; **у него́ разболе́лся зуб** уның теше һыҙлап китте

**РАЗБО́ЛТАННОСТЬ** *ж* тотанаҡһыҙлыҡ, тәртипһеҙлек

**РАЗБО́ЛТАННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **разболта́ть** I; **2.** *прил.* тотанаҡһыҙ, тәртипһеҙ; **разбо́лтанный ма́льчик** тәртипһеҙ малай

**РАЗБОЛТА́ТЬ I** *сов. что*; *разг.* **1.** болғатыу, туҡыу; **разболта́ть муку́ в воде́** ондо һыуҙа болғатыу **2.** бушатыу; **разболта́ть га́йку** гайканы бушатыу

**РАЗБОЛТА́ТЬ II** *сов. что*; *разг.* фаш итеү, һөйләп (әйтеп, сисеп) ташлау; **разболта́ть секре́т** серҙе сисеп ташлау

**РАЗБОЛТА́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* **1.** (*размешаться*) болғатылыу, туҡылыу **2.** бушау, бушаҡланыу **3.** *перен.* тәртипһеҙләнеп китеү, тәртип йомшарыу; **ученики́ разболта́лись** уҡыусыларҙың тәртибе йомшарҙы

**РАЗБОЛТА́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* һүҙгә мауығып китеү, теле сиселеп китеү

**РАЗБОМБИ́ТЬ** *сов. кого-что* бомбаға тотоу; **разбомби́ть мост** күперҙе бомбаға тотоу

**РАЗБО́Р** *м* **1.** *см.* **разобра́ть** — **разбира́ть**; **разбо́р предложе́ния** һөйләм тикшереү **2.** *разг.* (*обычно с предлогами "без", "с"*) ҡарамай (һайламай) ғына, ҡарамайынса, һайламайынса; **брать без разбо́ра** ҡарамайынса алыу **3.** *уст.* (*сорт, качество*) сорт; **мука́ второ́го разбо́ра** икенсе сорт он ♦ **прийти́ к ша́почному разбо́ру** туй үткәс — дөмбөргә (*эш бөткәс килеү*)

**РАЗБО́РКА** *ж см.* **разобра́ть** — **разбира́ть**; **разбо́рка книг** китаптарҙы айырыу; **разбо́рка маши́ны** машинаны һүтеү

**РАЗБО́РНЫЙ,** -ая, -ое һүтелмәле, (һүтеп) йыйылмалы, тағатылмалы; **разбо́рный дом** йыйылмалы өй; **разбо́рный шкаф** һүтеп йыйылмалы шкаф

**РАЗБО́РЧИВОСТЬ** *ж* **1.** талымлы (талапсан) булыу, талым, талымлылыҡ, талапсанлыҡ, наҙлылыҡ, нәҙбереклек; **разбо́рчивость покупа́теля** һатып алыусының талапсанлығы **2.** асыҡлыҡ, аныҡлыҡ (*яҙыуға ҡарата*); **разбо́рчивость по́черка** яҙыуҙың аныҡлығы

**РАЗБО́РЧИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** талапсан, наҙлы, һайлансыҡ, талымлы, нәҙберек; **разбо́рчивый в еде́** ашҡа талымлы; **разбо́рчивый ю́ноша** наҙлы егет **2.** асыҡ, аныҡ, аңлайышлы, танырлыҡ; **разбо́рчивый по́черк** асыҡ яҙыу

**РАЗБРАКОВА́ТЬ** *сов. что*; *спец.* сортҡа айырыу (*продукцияны*), брак табыу

**РАЗБРАКО́ВКА** *ж*; *спец. см.* **разбракова́ть**; **разбрако́вка тка́ней** туҡыманы сортҡа айырыу

**РАЗБРАНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* әрләп (һүгеп) ташлау

**РАЗБРАНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* әрләшеү, талашыу, ыҙғышыу, тиргәшеү

**РАЗБРА́СЫВАНИЕ** *с см.* **разбра́сывать**; **разбра́сывание листо́вок** листовкалар ташлау; **разбра́сывание семя́н** орлоҡтарҙы һибеү

**РАЗБРА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **разброса́ть**

**РАЗБРА́СЫВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** *см.* **разброса́ться 2.** *перен. кем-чем* баһаламау, һанламау **3.** *страд. от* **разбра́сывать**

**РАЗБРЕДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **разбрести́сь**

**РАЗБРЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** таралышыу, таралышып бөтөү; **разбрести́сь в ра́зные сто́роны** төрлө яҡҡа таралышып бөтөү **2.** *перен.* (*о мыслях*) буталыу, таралыу; **мы́сли разбрели́сь** фекерҙәр буталды

**РАЗБРО́Д** *м* **1.** *уст. см.* **разбрести́сь — разбреда́ться 2.** *разг.* (*в мыслях*) буталсыҡлыҡ, тырым-тырағайлыҡ **3.** (*разлад*) тарҡаулыҡ, тарҡалыш; **иде́йный разбро́д** фекер тарҡаулығы

**РАЗБРОНИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* бронен алыу

**РАЗБРО́С** *м* **1.** *см.* **разброса́ть — разбра́сывать**; **разбро́с семя́н** орлоҡ һибеү **2.** *см.* **разброса́ться — разбра́сываться**

**РАЗБРО́САННОСТЬ** *ж* тарҡаулыҡ, тараулыҡ; **разбро́санность населе́ния** халыҡтың тарҡаулығы

**РАЗБРО́САННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от.* **разброса́ть 2.** *прил.*; *перен.*, *разг.* тарау, тарҡау, буталсыҡ; **разбро́санные мы́сли** буталсыҡ фекерҙәр; **разбро́санные дома́** тарау йорттар

**РАЗБРОСА́ТЬ** *сов. что* **1.** таратыу, таратып ташлау; **разброса́ть бума́ги** ҡағыҙҙарҙы таратып ташлау **2.** туҙҙырыу, туҙҙырып ташлау; **разброса́ть ве́щи** әйберҙәрҙе туҙҙырып ташлау **3.** (*зерно и т.п. во время посева, посадки*) һибелдереү, таратып ултыртыу **4.** *перен.*, *разг.* төрлө яҡҡа ташлау, таратыу; **жизнь разброса́ла нас** тормош беҙҙе төрлө яҡҡа ташланы **5.** *перен.*, *разг.* бушҡа ебәреү, әрәм-шәрәм итеү, осороу, бөтөрөү (*аҡсаны һ.б.*); **разброса́ть все де́ньги** бөтә аҡсаны тотоноп бөтөрөү

**РАЗБРОСА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (аяҡ-ҡулды) ташлап (асылып) ятыу (йоҡлау), йәйелеп ултырыу; **разброса́ться во сне** аяҡ-ҡулды ташлап йоҡлау **2.** һибелеү, таралыу, тарау (бербереһенән алыҫ) урынлашыу; **на лугу́ разбро́саны пала́тки** палаткалар болонлоҡта тарау урынлашҡан **3.** (*одновременно заняться многим, не сосредоточиваясь на чём-л. одном*) төрлө эш менән шөғөлләнеү (*бер үк ваҡытта*)

**РАЗБРО́СИТЬ** *сов. что*; *разг.* туҙҙырып (таратып) ташлау

**РАЗБРО́СКА** *ж*; *разг. см.* **разброса́ть — разбра́сывать**; **разбро́ска семя́н** орлоҡтар һибеү; **разбро́ска наво́за** тиреҫ таратыу

**РАЗБРОСНО́Й,** -ая, -ое *с.-х.* **1.** һибеп сәселгән; **разбросно́й посе́в** һибеп сәсеү **2.** һипмә, һибеп сәскес; **разбросна́я се́ялка** һипмә сәскес

**РАЗБРЫ́ЗГАТЬ** *сов. что* **1.** сәсрәтеү, һибеү, бөркөү; **разбры́згать во́ду** һыу сәсрәтеү **2.** сәсрәтеп (һибеп, бөркөп) бөтөрөү; **разбры́згать духи́** хушбуйҙы һибеп бөтөрөү

**РАЗБРЫ́ЗГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һибелеп (сәсрәп) китеү, түгелеү; **вода́ разбры́згалась** һыу сәсрәп китте

**РАЗБРЫ́ЗГИВАНИЕ** *с см.* **разбры́згивать, разбры́згиваться**; **разбры́згивание жи́дких удобре́ний** шыйыҡ ашламалар һиптереү

**РАЗБРЫ́ЗГИВАТЕЛЬ** *м* һиптергес; **разбры́згиватель удобре́ний** ашлама һиптергес

**РАЗБРЫ́ЗГИВАТЬ** *несов. см.* **разбры́згать**

**РАЗБРЫ́ЗГИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **разбры́згивать**

**РАЗБРЮЗЖА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* мығырлай (мыжый) башлау, һуҡранырға тотоноу

**РАЗБУДИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (йоҡонан) уятыу; **разбуди́ть дете́й** балаларҙы уятыу **2.** *перен.*, *разг.* уятыу, ҡабыҙыу, тоҡандырыу; **разбуди́ть любо́вь** мөхәббәт уятыу

**РАЗБУРА́ВИТЬ** *сов. что* быраулап киңәйтеү

**РАЗБУРИ́ТЬ** *сов. что* быраулау, быраулап тишеү

**РАЗБУХА́НИЕ** *с см.* **разбу́хнуть — разбуха́ть**; **разбуха́ние де́рева в воде́** һыуҙа ағастың шешенеүе; **разбуха́ние по́чек** бөрөләрҙең тулышыуы (бүртеүе); **разбуха́ние шта́тов** штат ҙурайыу

**РАЗБУХА́ТЬ** *несов. см.* **разбу́хнуть**

**РАЗБУ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** күбеү, бүртеү, бүртенеү, шешенеү, тулышыу; **доска́ разбу́хла** таҡта шешенгән **2.** *перен.*, *разг.* саманан тыш (самаһыҙ) ҙурайыу (күбәйеү, артыу); **шта́ты разбу́хли** штат самаһыҙ ҙурайҙы

**РАЗБУШЕВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ажғырыу, ыжғырыу, ҡотороу, ҡотороноу, ҡоторона башлау; **ве́тер разбушева́лся** ел ҡоторҙо; **мо́ре разбушева́лось** диңгеҙ ҡоторондо **2.** *перен.*, *разг.* (*начать буянить*) шашыныу, ҡотороноу, пыр туҙыу, ғауға күтәреү, дау ҡуптарыу

**РАЗБУЯ́НИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шашыныу, ҡотороноу, дау (ғауға) ҡуптарыу

**РАЗВА́Л** *м* **1.** *см.* **развали́ть — разва́ливать** I, **развали́ться — разва́ливаться** I 1—3; **разва́л стены́** стенаның емерелеүе; **разва́л хозя́йства** хужалыҡтың бөлгөнлөккә төшөүе; **разва́л семьи́** ғаиләнең тарҡалыуы **2.** *разг.* тәртипһеҙлек, буталсыҡлыҡ, тәртипһеҙ (буталсыҡ) хәл

**РАЗВА́ЛЕЦ** и **РАЗВА́ЛЬЦА: ходи́ть с разва́льцем (разва́льцей)** *разг.* алпан-толпан (баҫып) йөрөү, аушанлап атлау

**РАЗВА́ЛИВАНИЕ** *с см.* **разва́ливать** I — **разва́ливаться** I

**РАЗВА́ЛИВАТЬ I** *несов. см.* **развали́ть**

**РАЗВА́ЛИВАТЬ II** *несов. см.* **развали́ть**

**РАЗВА́ЛИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **развали́ться 2.** *страд. от* **разва́ливать** I

**РАЗВА́ЛИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **разва́ливать** II

**РАЗВА́ЛИНА** *ж* **1.** *обычно мн.* **разва́лины** емереклек, вайран булыу, хараба; **стра́шные разва́лины** ҡот осҡос хараба **2.** *разг.* ҡаҡшаған (бәлйерәгән) кеше

**РАЗВА́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** киң, уңайлы; **разва́листое кре́сло** уңайлы кресло **2.** алпан-толпан, аушанлаҡ; **разва́листая похо́дка** алпан-толпан атлау

**РАЗВАЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** таратыу, таратып ташлау; **развали́ть брёвна** бүрәнәләрҙе таратыу **2.** *разг.* емереү, ҡолатыу, ауҙарыу; **развали́ть сте́ну** стенаны емереү **3.** *перен.* тарҡатыу, ҡыйратыу; **развали́ть хозя́йство** хужалыҡты тарҡатыу

**РАЗВАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** таралып (ишелеп) төшөү **2.** емерелеү, емерелеп (ауып) төшөү; **забо́р развали́лся** ҡойма емерелеп төшкән **3.** *перен.* (*прийти в упадок*) тарҡалыу, бөлөү, емерелеү, эштән сығыу; **коллекти́в развали́лся** коллектив тарҡалды **4.** *разг.* йәйелеп ултырыу (ятыу); **развали́ться на дива́не** диванда йәйелеп ултырыу

**РАЗВАЛЮ́ХА** *ж*; *прост.* емерек өй (ҡаралты)

**РАЗВАЛЯ́ТЬ** *сов. что* **1.** таратыу, таратып ташлау **2.** (*тесто*) тәгәрләтеп йоҡартыу, йәйеү, тәгәрәтеп йәйеү

**РАЗВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **развари́ть**

**РАЗВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **развари́ться** **2.** *страд. от* **разва́ривать**

**РАЗВАРИ́ТЬ** *сов. что* ныҡ бешереү, ылбыратыу, иҙратыу; **развари́ть мя́со** итте ылбыратҡансы бешереү

**РАЗВАРИ́ТЬСЯ** *сов.* ылбырау, иҙрау, иҙелеп бешеү; **карто́шка развари́лась** картуф иҙраған

**РАЗВАРНО́Й,** -ая, -ое *уст.* ылбыраған, иҙраған, иҙелеп бешкән; **разварно́й карто́фель** иҙелеп бешкән картуф

**РА́ЗВЕ** *частица* и *союз* **1.** *частица* (*неужели*) -мы/-ме ни, әллә; **ра́зве он прие́хал?** ул ҡайттымы ни?; **ра́зве она́ уе́хала?** ул киттеме әллә? **2.** *частица* (*может быть*) әллә -мы/-ме икән; **ра́зве за́втра съе́здить** әллә иртәгә барып килергәме икән **3.** *частица* (*лишь только*) бары, тик, -нан/-нән башҡаһы, -ны/-не иҫәпләмәгәндә; **дом всё тот же, ра́зве кра́ска ко́е-где́ сле́зла** өй һаман шул уҡ, тик ҡайһы бер урында буяуы ғына ҡупҡан **4.** *союз условно-противит.* -һа/-һә, башҡа; **он непреме́нно это сде́лает, ра́зве то́лько заболе́ет** ауырып ҡына китмәһә, ул быны эшләр

**РАЗВЕВА́ТЬ** *несов. что* елберләтеү, ялпылдатыу; **ве́тер развева́ет фла́ги** ел байраҡтарҙы елберләтә

**РАЗВЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** елберләү, ялпылдау, өлтәнләү; **развева́ться на ветру́** елгә елберләү; **во́лосы развева́ются** сәсе өлтәнләп килә **2.** *страд. от* **развева́ть**

**РАЗВЕ́ДАТЬ** *сов. что* **1.** *о ком-чём* асыҡлау, тикшереп (һорашып) белеү; **разве́дать о её наме́рениях** уның ниәтен һорашып белеү **2.** тикшереү, эҙләү, асыҡлау; **разве́дать месторожде́ния га́за** газ ятҡылыҡтары эҙләү; **разве́дать расположе́ние сил проти́вника** дошман көстәре урынлашҡан ерҙе асыҡлау

**РАЗВЕДЕ́НИЕ** *с см.* **развести́** — **разводи́ть** 1, 2, 4—6; **разведе́ние пчёл** ҡорт үрсетеү; **разведе́ние кле́я** елемде шыйығайтыу; **разведе́ние костра́** усаҡ тоҡандырыу

**РАЗВЕДЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **развести́** **2.** *прил.* айырылышҡан, айырылған; **разведённая же́нщина** (ирҙән) айырылған ҡатын **3.** *прил.* (*не очень насыщенный*) шыйығайтылған, һыуҙа ирегән

**РАЗВЕ́ДКА** *ж* **1.** *см.* **разве́дать** 2; **разве́дка ме́стности** ерҙе тикшереү; **посла́ть ро́ту на разве́дку** ротаны разведкаға ебәреү **2.** *в разн. знач.* разведка, шәйләк; **ко́нная разве́дка** атлы шәйләк

**РАЗВЕ́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое разведка ...ы; **разве́дочная сква́жина** разведка скважинаһы; **разве́дочные рабо́ты** разведка эштәре

**РАЗВЕ́ДЧИК** *м* **1.** *воен.* разведчик, шәйләксе **2.** *геол.* разведчик, эҙләүсе; **разве́дчики не́фти** нефть эҙләүселәр **3.** (*самолёт или судно*) разведчик; **кора́бль-разве́дчик** разведчик карап

**РАЗВЕ́ДЧИЦА** *ж см.* **разве́дчик** 1, 2

**РАЗВЕ́ДЫВАНИЕ** *с см.* **разве́дывать**; **разве́дывание цветны́х мета́ллов** төҫлө металдар эҙләү

**РАЗВЕ́ДЫВАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое разведка ...ы, шәйләк ...ы; **разве́дывательный центр** разведка үҙәге; **разве́дывательный отря́д** разведка отряды

**РАЗВЕ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **разве́дать**

**РАЗВЕЗТИ́** *сов. что* **1.** таратыу, таратып бөтөрөү (сығыу), алып барыу; **развезти́ пи́сьма** хаттарҙы таратып сығыу **2.** *безл.*; *разг.* быссратыу, иҙеү; **доро́гу от дожде́й развезло́** ямғыр юлды иҙгән **3.** *безл.*; *прост.* әлһерәү, иҙрәү; **от жары́ его́ развезло́** ул эҫелектән әлһерәгән

**РАЗВЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **разве́ять**

**РАЗВЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разве́яться** **2.** *страд. от* **разве́ивать**

**РАЗВЕНЧА́ТЬ** *сов. кого-что* дәрәжәһен (абруйын, данын) төшөрөү; **развенча́ть знамени́тость** атаҡлы кешенең данын төшөрөү

**РАЗВЕ́НЧИВАНИЕ** *с см.* **разве́нчивать**

**РАЗВЕ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **развенча́ть**

**РАЗВЕ́НЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **разве́нчивать**

**РАЗВЕ́РЗНУТЬ** *сов. что*; *книжн.* киң итеп асыу, асыу; **землетрясе́ние разве́рзло про́пасть** ер тетрәү упҡын асты

**РАЗВЕ́РЗНУТЬСЯ** *сов.*; *книжн.* асылыу, өңрәйеп асылыу, асылып китеү; **разве́рзлась бе́здна** упҡын асылған

**РАЗВЁРНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **развернýть 2.** *прил.* йәйелгән, йәйелдерелгән; **развёрнутые ряды́** йәйелгән сафтар **3.** *прил.* киң, киңәйтелгән; **развёрнутое строи́тельство** киң төҙөлөш **4.** *прил.* тулы, ентекле; **развёрнутый план** ентекле план

**РАЗВЕРНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** тағатыу, йәйеү, сисеү, асыу; **развернýть ковёр** келәм йәйеү; **развернýть свёрток** төргәк сисеү **2.** яҙыу, турайтыу, төҙәйтеү; **развернýть плéчи** яурындарҙы турайтыу **3.** *воен.* (*расположить в ширину по линии фронта*) йәйелдереү; **развернýть полк** полкты йәйелдереү **4.** *воен.* (*переформировать в более крупную единицу*) әйләндереү, үҙгәртеп (яңынан) ойоштороу, төҙөү; **развернýть батальо́н в полк** батальонды полкка әйләндереү **5.** *перен.* киң ҡолас биреү (йәйелдереү), йәйелдереп ебәреү; **широко́ развернýть соревновáние** ярышты киң йәйелдереү; **развернýть строи́тельство** төҙөлөштө йәйелдереп ебәреү **6.** бороу, бороп ебәреү; **развернýть танк** танкыны бороп ебәреү

**РАЗВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тағатылыу, һүтелеү, сиселеү, асылыу; **свёрток развернýлся** төйөнсөк сиселгән **2.** *воен.* йәйелеү, теҙелеү; **строй развернýлся** саф йәйелде **3.** *воен.* әйләндереү, үҙгәртеп (яңынан) ойошторолоу, төҙөлөү; **полк развернýлся в бригáду** полк бригадаға әйләндерелде **4.** *перен.* йәйелеү, киң йәйелеү, йәйелеп китеү, киң ҡолас алыу; **развернýлась подгото́вка к весéннему сéву** яҙғы сәсеүгә әҙерлек киң ҡолас алды **5.** (эш) башлап ебәреү, асылыу, ойошторолоу, булдырылыу; **развернýлась торго́вля** һатыу ойошторолдо **6.** үҫеп китеү, үҙен күрһәтеү, иң һыҙғанып тотоноу; **развернýлся талáнт** талант үҫеп китте **7.** боролоу; **самолёт развернýлся** самолёт боролдо **8.** *прост.* (*размахнуться*) киҙәнеү, һелтәнеү

**РАЗВЕРСТА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* бүлеү, бүлеп биреү (сығыу); **разверстáть план загото́вок по райо́нам респýблики** республика райондарына етештереү планын бүлеп биреү **2.** *что*; *полигр.* вёрсткалау, вёрсткаға һалыу **3.** *что*; *полигр.* вёрстканы һүтеү

**РАЗВЁРСТКА** *ж* развёрстка (*нимәнеңдер план буйынса бүленеше*)

**РАЗВЁРСТЫВАТЬ** *несов. см.* **разверстáть**

**РАЗВЕРТЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** бырауалап киңәйтеү, артыҡ бырауалау; **развертéть отвéрстие** тишекте бырауалап киңәйтеү **2.** (зыр) әйләндереп (зырлатып) ебәреү; **развертéть колесо́** тәгәрмәсте зыр әйләндереп ебәреү

**РАЗВЕРТЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** артыҡ бороп киңәйтеү (ҙурайтыу) **2.** ҡыҙыу әйләнә башлау, зыр әйләнеп китеү, зырлау; **колесо́ развертéлось** тәгәрмәс ҡыҙыу әйләнә башланы

**РАЗВЁРТКА I** *ж* **1.** *см.* **развернýть** — **развёртывать** 1, 2; **2.** *спец.* йәйелмә; **развёртка ко́нуса** конус йәйелмәһе; **развёртка цили́ндра** цилиндр йәйелмәһе

**РАЗВЁРТКА II** *ж* **1.** *см.* **развертéть** — **развéрчивать** 1, **развертéться** — **развéрчиваться** 1; **2.** (*инструмент*) развёртка (*металдағы тишекте киңәйтә, ҙурайта торған ҡорал*)

**РАЗВЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **развернýть**

**РАЗВЁРТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **развернýться 2.** *страд. от* **развёртывать**

**РАЗВЕ́РЧИВАНИЕ** *с см.* **развертéть**

**РАЗВЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **развертéть**

**РАЗВЕ́РЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **развертéться 2.** *страд. от* **развéрчивать**

**РАЗВЕ́С** *м см.* **развéсить** I — **развéшивать** I; **развéс продýктов** аҙыҡты үлсәп бүлеү

**РАЗВЕСЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* күңелләндереү, күңел күтәреү (асыу), кәйефен күтәреү; **развесели́ть дрýга** дуҫтың күңелен күтәреү

**РАЗВЕСЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* күңелләнеү, күңел (кәйеф) күтәрелеү, кәйефләнеү, күнел асылыу; **дéти развесели́лись** балаларҙың күңеле күтәрелде

**РАЗВЕСЁЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* бик шат, күңелле, күтәренке кәйефле; **развесёлые дéвочки** бик шат ҡыҙыҡайҙар

**РАЗВЕ́СИСТЫЙ,** -ая, -ое тарбаҡай, тарбаҡ(лы); **развéсистый дуб** тарбаҡ имән

**РАЗВЕ́СИТЬ I** *сов. что* (*разделить на части по весу*) үлсәп бүлеү (бүлеп сығыу); **развéсить мукý** ондо үлсәп бүлеү

**РАЗВЕ́СИТЬ II** *сов. что* **1.** элеү, элеп сығыу (бөтөү), таратып элеү; **развéсить карти́ны** картиналарҙы элеп сығыу **2.** йәйеү, йәйеп ебәреү; **дéрево развéсило густы́е вéтви** ағас ҡуйы ботаҡтарын йәйеп ебәргән ♦ **развéсить ýши** *ирон.* ҡолаҡ(ты) ҡарпайтып тыңлау, ауыҙ асып тыңлау

**РАЗВЕ́СИТЬСЯ** *сов.* тарбаҡланыу, тарбаҡай булыу

**РАЗВЕ́СКА I** *ж см.* **развéсить** I — **развéшивать** I; **развéска муки́** ондо үлсәп бүлеү

**РАЗВЕ́СКА II** *ж*; *разг. см.* **развéсить** II; **развéска карти́н** картиналарҙы элеү

**РАЗВЕСНО́Й,** -ая, -ое үлсәнмәле, үлсәмле, үлсәп һатыла торған; **развесно́е печéнье** үлсәп һатыла торған печенье

**РАЗВЕСТИ́** *сов. кого-что* **1.** таратыу, урынлаштырыу, алып барып (илтеп) ҡуйыу, таратып (ҡуйып) сығыу; **развести́ детéй по домáм** балаларҙы өйҙәренә илтеп ҡуйыу; **развести́ часовы́х по постáм** һаҡсыларҙы постарға ҡуйып сығыу **2.** күтәреү, айырып ҡуйыу (*төрлө яҡҡа*); **развести́ мост** күперҙе күтәреү **3.** айырыу, айырып ебәреү; **судьбá развелá друзéй** яҙмыш дуҫтарҙы айырҙы; **развести́ супрýгов** ир менән ҡатынды айырыу **4.** иҙеү, иретеү; **развести́ порошо́к водо́й** онтаҡты һыуҙа иретеү **5.** үрсетеү, аҫрау, үҫтереү; **развести́ сад** баҡса үҫтереү; **развести́ пчёл** ҡорт үрсетеү **6.** яғыу, яғып ебәреү, тоҡандырыу; **развести́ костёр** ут яғып

ебәреү ♦ **развести́ рука́ми** аптырап ҡалыу, шаҡ ҡатыу

**РАЗВЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** айырылышыу, айырылыу; **развести́сь с му́жем** ир менән айырылышыу **2.** ныҡ үрсеү, күбәйеп китеү; **развело́сь мно́го мух** себен күбәйеп киткән

**РАЗВЕТВИ́ТЬ** *сов. что* тармаҡлау, айырыу, бүлеү; **разветви́ть железнодоро́жный путь** тимер юлын тармаҡлау

**РАЗВЕТВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ботаҡланыу,ботаҡтар үҫеп сығыу (ебәреү); **дуб разветви́лся** имән ботаҡтар ебәрҙе **2.** тармаҡланыу, тармаҡланып (айырылып) китеү; **руче́й разветви́лся** йылға тармаҡланып киткән; **доро́га разветви́лась** юл айырылып китә

**РАЗВЕТВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **разветви́ть** — **разветвля́ть**, **разветви́ться** — **разветвля́ться** **2.** айырса, сат, тармаҡ; **разветвле́ние доро́ги** юл саты **3.** (*часть, отрасль и т.п.*) тармаҡ

**РАЗВЕТВЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разветви́ть** **2.** *прил.* тармаҡлы, айырсалы, саталы; **разветвлённые доро́ги** тармаҡлы юлдар **3.** *прил.* (күп) тармаҡлы; **разветвлённая организа́ция** тармаҡлы ойошма

**РАЗВЕТВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **разветви́ть**

**РАЗВЕТВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разветви́ться** **2.** *страд. от* **разветвля́ть**

**РАЗВЕ́ШАТЬ** *сов. что* элеү, элеп ҡуйыу (сығыу); **разве́шать бельё** кер элеү; **разве́шать карти́ны** картиналарҙы элеп сығыу

**РАЗВЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **разве́сить** I

**РАЗВЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **разве́сить** II, **разве́шать**

**РАЗВЕ́ЯТЬ** *сов. что* **1.** туҙҙырыу, таратыу, осороу, осороп бөтөрөү; **ве́тер разве́ял облака́** ел болоттарҙы таратты **2.** *перен.* таратыу, бөтөрөү, юҡҡа сығарыу; **разве́ять сомне́ния** шикте таратыу

**РАЗВЕ́ЯТЬСЯ** *сов.* **1.** таралыу, таралып (осоп) бөтөү; **пыль разве́ялась** туҙан осоп бөттө **2.** *перен.* таралыу, юҡҡа сығыу; **печа́ль разве́ялась** һағыш таралды **3.** *разг.* (*развлечься*) йыуаныу, күңел асыу

**РАЗВИВА́ТЬ** *несов. см.* **разви́ть**

**РАЗВИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разви́ться** **2.** барыу, үтеү, үҫешеү; **собы́тия развива́ются бы́стро** ваҡиғалар бик тиҙ үҫешә **3.** *страд. от* **развива́ть**

**РАЗВИЗЖА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* сыйылдай башлау, сыйылдарға тотоноу

**РАЗВИ́ЛИНА** *ж* **1.** (*у дерева*) сата, аса, тармаҡ; **разви́лина ду́ба** имән асаһы **2.** сат, айырса, армыт, сата; **разви́лина доро́ги** юл саты; **разви́лина у́лицы** урам саты

**РАЗВИ́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое асалы, саталы, айырсалы, тармаҡлы; **разви́листая доро́га** айырсалы юл; **разви́листое де́рево** асалы ағас; **разви́листый сук** саталы ботаҡ

**РАЗВИ́ЛКА** *ж* и **РАЗВИ́ЛОК** *м*; *разг. см.* **разви́лина** 2

**РАЗВИНТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** бороп бушатыу, бушағыраҡ итеү; **развинти́ть шуру́п** шөрөптө бороп бушатыу **2.** бороп алыу (сығарыу), һүтеп ташлау; **развинти́ть ча́сти замка́** йоҙаҡты һүтеп ташлау

**РАЗВИНТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бушау, ҡаҡшау, таралыу; **га́йка развинти́лась** гайка бушаған **2.** *перен.*, *разг.* ҡаҡшау, боҙолоу, йомшарыу; **не́рвы развинти́лись** нервылар ҡаҡшаған **3.** *перен.*, *разг.* (*разболтаться*, *распуститься*) ҡулдан ысҡыныу, тотанаҡһыҙланыу, әҙәпһеҙләнеү

**РАЗВИ́НЧЕННОСТЬ** *ж* ҡаҡшағанлыҡ, арығанлыҡ, һүлпәнлек, тотанаҡһыҙлыҡ; **разви́нченность не́рвов** нервыларҙың ҡаҡшағанлығы

**РАЗВИ́НЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **развинти́ть** **2.** *прил.*; *разг.* ҡаҡшаған, йомшаған, боҙолған, тотанаҡһыҙ; **разви́нченные не́рвы** ҡаҡшаған нервылар **3.** *прил.*; *разг.* тәнтерәк, ҡыйыш-мыйыш; **разви́нченная похо́дка** ҡыйыш-мыйыш атлау

**РАЗВИ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **развинти́ть**

**РАЗВИ́НЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **развинти́ться** **2.** *страд. от* **разви́нчивать**

**РАЗВИ́ТИЕ** *с* **1.** *см.* **разви́ть** — **развива́ть** 2—6; **зако́ны обще́ственного разви́тия** йәмғиәттең үҫеш законлары; **разви́тие произво́дства** етештереүҙең үҫеүе **2.** үҫеш; **истори́ческое разви́тие** тарихи үҫеш **3.** (*степень умственной, духовной зрелости*) кимәл; **полити́ческое разви́тие** сәйәси аң кимәле

**РАЗВИТО́Й,** -ая, -ое **1.** ныҡ, көслө, ҡеүәтле, ҡөҙрәтле; **развиты́е му́скулы** көслө мускулдар **2.** (*зрелый, просвещённый*) аңлы, белемле, зирәк, сос; **развито́й ребёнок** зирәк бала **3.** алға киткән, үҫешкән; **развита́я промы́шленность** үҫешкән сәнәғәт **4.** *в кратк. ф. в знач. сказ.* киң таралған, ныҡ үҫешкән; **в Башкортоста́не развита́ хи́мия** Башҡортостанда химия ныҡ үҫешкән

**РАЗВИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*раскрутить*) һүтеү, тағатыу; **разви́ть верёвку** бауҙы тағатыу **2.** үҫтереү, нығытыу; **разви́ть па́мять** хәтерҙе үҫтереү; **разви́ть спосо́бности** һәләтлекте үҫтереү **3.** көсәйтеү, үҫтереү; **разви́ть машинострое́ние** машиналар төҙөүҙе үҫтереү; **разви́ть тво́рческую де́ятельность молодёжи** йәштәрҙең ижади эшмәкәрлеген үҫтереү **4.** (*широко развернуть*) йәйелдереү, киңәйтеү; **разви́ть бу́рную де́ятельность** көслө эшмәкәрлек йәйелдереү **5.** арттырыу; **самолёт разви́л ско́рость** самолёт тиҙлеген арттырҙы **6.** тәрәнәйтеү, киңәйтеү, үҫтереү; **разви́ть иде́ю** фекерҙе үҫтереү

**РАЗВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*раскрутиться*) тағатылыу, һүтелеү **2.** үҫеп китеү, нығынып китеү; **органи́зм разви́лся** организм нығынып китте; **тала́нт разви́лся** һәләт үҫеп китте **3.** үҫешеү, көсәйеү, алға китеү, киң үҫеш алыу; **развило́сь**

**самоде́ятельное иску́сство** үҙешмәкәр сәнғәт үҫеште **4.** артыу; **при спу́ске развила́сь больша́я ско́рость** түбән төшкәндә тиҙлек нық артты **5.** аң (зиһен) үҫеү, төрлө яҡлап камиллашыу; **ребёнок разви́лся** бала төрлө яҡлап камиллашты

**РАЗВЛЕКА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡлы, күңел аса торған; **развлека́тельные фи́льмы** мауыҡтырғыс фильмдар

**РАЗВЛЕКА́ТЬ** *несов. см.* **развле́чь**

**РАЗВЛЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **развле́чься** **2.** *страд. от* **развлека́ть**

**РАЗВЛЕЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **развле́чь** — **развле́чься** **2.** уйын-көлкө, кәйеф-сафа ҡороу, күңел асыу; **ма́ссовое развлече́ние** күмәк уйын-көлкө

**РАЗВЛЕ́ЧЬ** *сов. кого* **1.** (*отвлечь*) йыуатыу, әүрәтеү, иғтибарын ситкә йүнәлтеү; **развле́чь ребёнка** баланы әүрәтеү **2.** (*повеселить*) күңелен асыу (күтәреү), кәйефен күтәреү; **развле́чь весёлым расска́зом** күңелле хәбәр менән кәйефте күтәреү

**РАЗВЛЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** (*отвлечься*) йыуаныу, йыуаныс табыу, яҙылыу, әүрәү; **ребёнок развлёкся игро́й** бала уйынға әүрәне **2.** (*повеселиться*) уйнау-көлөү, күңел асыу; **развле́чься по́сле трудово́го дня** эш көнөнән һуң күңел асыу

**РАЗВО́Д** *м* **1.** *см.* **развести́** — **разводи́ть** 1, 2, 5; **разво́д часовы́х** һаҡсыларҙы (посҡа) ҡуйыу; **разво́д моста́** күперҙе айырып ҡуйыу **2.** *воен.* алмаштырыу, развод; **разво́д карау́лов** ҡарауыл алмаштырыу **3.** айырылышыу, айырылыу (*ир менән ҡатынға ҡарата*); **получи́ть разво́д от му́жа** ирҙән айырылыу

**РАЗВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **развести́**

**РАЗВОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **развести́сь** **2.** *страд. от* **разводи́ть**

**РАЗВО́ДКА** *ж* **1.** *см.* **развести́** — **разводи́ть** 1, 2, 5, 6; **разво́дка моста́** күперҙе күтәреү **2.** (*инструмент для разведения зубьев пилы*) ҡайырғыс

**РАЗВОДНО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡайырғыс; **разводно́й ключ** ҡайырғыс асҡыс **2.** айырыла (күтәрелә) торған; **разводно́й мост** күтәрелә торған күпер

**РАЗВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое айырылышыу; **разво́дное свиде́тельство** айырылышыу таныҡлығы

**РАЗВО́ДЫ** *только мн.* **1.** (*узор*) биҙәк; **таре́лка с разво́дами** биҙәкле тәрилкә **2.** (*у саней*) үрәсә; **са́ни с разво́дами** үрәсәле сана

**РАЗВО́ДЬЕ** *с* (*пространство воды между льдинами*) йылыу, ҡаран

**РАЗВОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **разводи́ть** **2.** *в знач. сущ.* **разводя́щий** *м*; *воен.* развод яһаусы, разводящий (*һаҡсыларҙы постарға ҡуйыусы*)

**РАЗВОЕВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* дыу килеү, дау ҡуптарыу, пыр туҙыу

**РАЗВО́З** *м см.* **развезти́** — **развози́ть** 1; **разво́з гру́зов** йөктәрҙе илтеп ҡуйыу; **разво́з проду́ктов** аҙыҡ-түлек таратыу

**РАЗВОЗИ́ТЬ** *несов. см.* **развезти́**

**РАЗВОЗИ́ТЬСЯ I** *несов. страд. от* **развози́ть**

**РАЗВОЗИ́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* ығы-зығы килеү, ҡайнашыу, шау-шыу күтәреү, ығы-зығы килә башлау, ҡайнаша башлау; **де́ти разво зи́лись** балалар ығы-зығы килә башланы

**РАЗВО́ЗКА** *ж*; *разг. см.* **развезти́** — **развози́ть** 1

**РАЗВОЗНО́Й,** -ая, -ое **1.** ташыу …ы; **развозна́я теле́жка** йөк арбаһы **2.** ташыла (йөрөтөлә) торған, ташып (йөрөтөп) таратыла торған; **развозно́й това́р** йөрөтөп һатыла торған тауар

**РАЗВО́ЗЧИК** *м* ташыусы, таратыусы

**РАЗВОЛНОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* тулҡынландырыу, тынғыһыҙлау, тынысһыҙландырыу, борсоу; **разволнова́ть неожи́данным изве́стием** көтөлмәгән хәбәр менән тулҡынландырыу

**РАЗВОЛНОВА́ТЬСЯ** *сов.* тынысһыҙланыу, тынғыһыҙланыу, тулҡынланыу, борсола башлау; **разволнова́ться пе́ред встре́чей** осрашыу алдынан тулҡынланыу

**РАЗВОРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **разворотИ́ть, разверну́ть**

**РАЗВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разверну́ться, развёртываться** **2.** *страд. от* **развора́чивать**

**РАЗВОРОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* урлап бөтөрөү, урлап ташып бөтөрөү; **разворова́ть иму́щество** мөлкәтте урлап бөтөрөү

**РАЗВОРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **разворова́ть**

**РАЗВОРО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **разворо́вывать**

**РАЗВОРО́Т** *м* **1.** *см.* **разверну́ть** — **развёртывать** 2, 5, **разверну́ться** — **развёртываться** 4, 5; **разворо́т полевы́х рабо́т** баҫыу эштәрен йәйелдереп ебәреү **2.** (*поворот*) боролош, боролма; **разворо́т доро́ги** юл боролмаһы **3.** эске яғы; **разворо́т обло́жки** тышлыҡтың эске яғы

**РАЗВОРОТИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** аҡтарыу, ҡутарыу, әйләндереп (таратып) ташлау; **разворотИ́ть гру́ду камне́й** таш өйөмөн ҡутарып ташлау **2.** (*разрушить*) емереү, емереп ташлау, ҡутарыу; **разворотИ́ть мостову́ю** урам ташын аҡтарып ташлау

**РАЗВОРОШИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* таратып (ҡутарып, аҡтарып, әйләндереп) ташлау; **разворошИ́ть се́но** бесәнде таратып ташлау

**РАЗВОРЧА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* мыжый (һуҡрана, һөйләнә, мығырлай) башлау; **стари́к разворча́лся** ҡарт һуҡрана башланы

**РАЗВРА́Т** *м* **1.** зина, зинасылыҡ, фәхешлек, уйнаш, фәхеш, юлдан яҙыу, аҙғынлыҡ; **предава́ться развра́ту** фәхеш юлына баҫыу **2.** (*испорченность нравов*) әхлаҡһыҙлыҡ, боҙоҡлоҡ, аҙ-

ғынлыҡ, бәйһеҙлек; **полити́ческий развра́т** сәйәси әхлаҡһыҙлыҡ **3.** *разг.* (*избалованность*) шашыу, шашҡанлыҡ, боҙолғанлыҡ

**РАЗВРАТИ́ТЕЛЬ** *м*; *книжн.* аҙҙырыусы, боҙоҡлоҡҡа өйрәтеүсе, юлдан яҙҙырыусы

**РАЗВРАТИ́ТЬ** *сов. кого-что* аҙҙырыу, боҙоҡлоҡҡа өйрәтеү, юлдан яҙҙырыу

**РАЗВРАТИ́ТЬСЯ** *сов.* аҙыу, боҙолоу, юлдан яҙыу

**РАЗВРА́ТНИК** *м* уйнашсы, зинасы, боҙоҡ, фәхеш кеше; **развра́тница** *ж* уйнашсы, зинасы, боҙоҡ, фәхишә

**РАЗВРА́ТНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* уйнаш (фәхешлек) итеү, зина ҡылыу

**РАЗВРА́ТНОСТЬ** *ж* фәхешлек, уйнашсылыҡ, зинасылыҡ

**РАЗВРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое аҙғын, боҙоҡ, боҙолған, фәхеш; **развра́тный челове́к** аҙғын кеше

**РАЗВРАЩА́ТЬ** *несов. см.* **разврати́ть**

**РАЗВРАЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разврати́ться** **2.** *страд. от* **развраща́ть**

**РАЗВРАЩЕ́НИЕ** *с см.* **разврати́ть** — **развраща́ть**, **разврати́ться** — **развраща́ться**; **развраще́ние несовершеннолетних** балиғ булмағандарҙы аҙҙырыу

**РАЗВРАЩЁННОСТЬ** *ж* аҙғынлыҡ, боҙоҡлоҡ, әхлаҡһыҙлыҡ

**РАЗВРАЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разврати́ть** **2.** *прил.* аҙғын, яман, боҙоҡ, әхлаҡһыҙ; **развращённый челове́к** аҙғын кеше

**РАЗВЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* олой башлау, олорға тотоноу **2.** *прост.* илай башлау

**РАЗВЬЮ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **развью́чить**

**РАЗВЬЮ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **развью́читься** **2.** *страд. от* **развью́чивать**

**РАЗВЬЮ́ЧИТЬ** *сов. кого-что* йөгөн бушатыу, артмағын алыу; **развью́чить осла́** ишәктең йөгөн бушатыу

**РАЗВЬЮ́ЧИТЬСЯ** *сов.* йөктән бушатылыу (бушау); **карава́н развью́чился** каруан йөктән бушатылды

**РАЗВЯЗА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* сисеү, ысҡындырыу, ысҡындырып ебәреү; **развяза́ть ле́нту** таҫманы сисеү; **развяза́ть у́зел** төйөндө сисеү **2.** *кого-что*; *перен.* мөмкинлек (юл, ирек) биреү; **развяза́ть тво́рческие си́лы наро́да** халыҡтың ижади көстәренә юл биреү ♦ **развяза́ть войну́** һуғыш асыу; **развяза́ть ру́ки** үҙ иркенә ҡуйыу; **развяза́ть язы́к**: 1) һөйләргә мәжбүр итеү, телен сисеү; 2) теле асылыу, теле асылып китеү

**РАЗВЯЗА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** сиселеү, ысҡыныу; **у́зел развяза́лся** төйөн сиселде **2.** *с кем-чем*; *перен.* ҡотолоу, арыныу; **развяза́ться с дела́ми** эштәрҙән арыныу **3.** *перен.*, *уст.* (*начать свободно себя вести*) ҡоторона башлау, ҡотороп китеү ♦ **язы́к развяза́лся** теле сиселде

**РАЗВЯ́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **развяза́ть** — **развя́зывать** 1; **развя́зка мешко́в** тоҡтар сисеү; **развя́зка узло́в** төйөндәрҙе сисеү **2.** тамамланыш, аҙағы, һуңы; **развя́зка бо́я** һуғыштың аҙағы; **развя́зка конфли́кта** конфликттың тамамланышы **3.** *лит.* сиселеш, тамамланыу; **счастли́вая развя́зка рома́на** романдың бәхетле тамамланыуы

**РАЗВЯ́ЗНОСТЬ** *ж* тотанаҡһыҙлыҡ, тыйнаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек; **развя́зность мане́р** ҡыланыштарҙың тотанаҡһыҙлығы

**РАЗВЯ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое тотанаҡһыҙ, тыйнаҡһыҙ, әҙәпһеҙ; **развя́зное поведе́ние** тотанаҡһыҙ ҡылыҡ; **развя́зный челове́к** тыйнаҡһыҙ кеше

**РАЗВЯ́ЗЫВАНИЕ** *с см.* **развя́зывать**, **развя́зываться**

**РАЗВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **развяза́ть**

**РАЗВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **развяза́ться** **2.** *страд. от* **развя́зывать**

**РАЗГАДА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** яуабын табыу, сисеү; **разгада́ть зага́дку** йомаҡ сисеү **2.** төшөнөү, аңлау, белеп (һиҙеп) ҡалыу; **разгада́ть наме́рение проти́вника** дошмандың ниәтен аңлау; **разгада́ть хи́трость** хәйләһенә төшөнөү

**РАЗГА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **разгада́ть** — **разга́дывать** **2.** яуап, сиселеш; **разга́дка зада́чи** мәсьәләнең яуабы

**РАЗГА́ДЧИК** *м*; *разг.* яуап табыусы, сисеүсе; **разга́дчик кроссво́рда** кроссворд сисеүсе

**РАЗГА́ДЫВАНИЕ** *с см.* **разга́дывать**; **разга́дывание зага́док** йомаҡ сисеү

**РАЗГА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **разгада́ть**

**РАЗГА́ДЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **разга́дывать**

**РАЗГА́Р** *м* **1.** ҡыҙыу (ҡыҙған) саҡ (мәл, ваҡыт); **рабо́та в разга́ре** эштең ҡыҙған ваҡыты **2.** *спец.* ышҡылып туҙыу, эштән сығыу

**РАЗГИ́Б** *м* **1.** *см.* **разогну́ть** — **разгиба́ть**, **разогну́ться** — **разгиба́ться** **2.** (*место, по которому что-л. разогнуто*) турайған (төҙәйтелгән) урын

**РАЗГИБА́ТЬ** *несов. см.* **разогну́ть**

**РАЗГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разогну́ться** **2.** *страд. от* **разгиба́ть**

**РАЗГИЛЬДЯ́Й** *м*; *разг.* эшлекһеҙ, илкеһалҡы эшләүсе, арамъя; **быть разгильдя́ем** эшлекһеҙ булыу

**РАЗГИЛЬДЯ́ЙНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* илкеһалҡы эшләү, арамъяланыу

**РАЗГИЛЬДЯ́ЙСТВО** *с*; *разг.* илкеһалҡылыҡ, арамъялыҡ, эшлекһеҙлек

**РАЗГЛАГО́ЛЬСТВОВАТЬ** *несов.*; *разг.* мәғәнәһеҙ күп һөйләү, сафсата һатыу

**РАЗГЛА́ДИТЬ** *сов. что* **1.** (*утюгом*) үтекләү, үтекләп шымартыу (тигеҙләү, яҙыу); **разгла́дить пла́тье** күлдәкте үтекләү **2.** (*расправить*) яҙыу, тигеҙләү, тәҫләү, шымартыу

**РАЗГЛА́ДИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать гладким*) тигеҙләнеү, яҙылыу, шымарыу, үтекләнеү; **пла́тье разгла́дилось** күлдәк яҙылды **2.** яҙылыу,

тигеҙләнеү; **морщи́ны на лбу разгла́дились** маңлайҙағы һырҙар тигеҙләнде

**РАЗГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **разгла́дить**

**РАЗГЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разгла́диться 2.** *страд. от* **разгла́живать**

**РАЗГЛАСИ́ТЬ** *сов. что, о чём* **1.** фашлау, фаш итеү, асыу; **разгласи́ть та́йну** серҙе асыу **2.** һөйләп йөрөү, таратыу

**РАЗГЛАША́ТЬ** *несов. см.* **разгласи́ть**

**РАЗГЛАШЕ́НИЕ** *с см.* **разгласи́ть — разглаша́ть**; **разглаше́ние госуда́рственной та́йны** дәүләт серен асыу; **разглаше́ние ло́жных слу́хов** ялған хәбәрҙәр таратыу

**РАЗГЛЯДЕ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** күреү, таныу, күреп (танып) алыу, айырыу; **разгляде́ть в потёмках** ҡараңғыла күреп алыу **2.** *перен., разг.* аңлау, төшөнөү, аңлап алыу

**РАЗГЛЯ́ДЫВАНИЕ** *с см.* **разгля́дывать**; **разгля́дывание ко́мнаты** бүлмәне ҡарап сығыу

**РАЗГЛЯ́ДЫВАТЬ** *несов. кого-что* ентекләп (тикшереп) ҡарау; **разгля́дывать прохо́жих** үтеп барыусыларҙы ентекләп ҡарау

**РАЗГНЕ́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разгне́вать 2.** *прил.* асыулы; **разгне́ванный взгляд** асыулы ҡараш; **разгне́ванный го́лос** асыулы тауыш

**РАЗГНЕ́ВАТЬ** *сов. кого-что* бик ныҡ асыуландырыу, асыуын ҡабартыу (килтереү); **разгне́вать отца́** атайҙың асыуын килтереү

**РАЗГНЕ́ВАТЬСЯ** *сов.* бик ныҡ асыуланыу, асыу килеү

**РАЗГОВА́РИВАТЬ** *несов. с кем-чем, о ком-чём* и *без доп.* һөйләшеү, гәпләшеү; **разгова́ривать с дру́гом** дуҫ менән һөйләшеү; **разгова́ривать о му́зыке** музыка тураһында һөйләшеү; **разгова́ривать неучти́во** әҙәпһеҙ һөйләшеү

**РАЗГОВО́Р** *м* **1.** һөйләшеү, һүҙ, әңгәмә; **разгово́р по телефо́ну** телефондан һөйләшеү; **ход разгово́ра** һүҙ ағышы; **вступи́ть в разгово́р** әңгәмәгә ҡушылыу **2.** *обычно мн.* **разгово́ры**; *разг.* (*слухи*) төрлө һүҙ, ғәйбәт, имеш-мимеш ♦ **без (ли́шних) разгово́ров** һис һүҙһеҙ; **и разгово́ра быть не мо́жет** һүҙ ҙә юҡ, һүҙ ҙә булырға тейеш түгел

**РАЗГОВОРИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** һөйләштер(т)еү; **его́ нелегко́ разговори́ть** уны һөйләштереүе ауыр **2.** һүҙгә мауыҡтырыу, әүрәтеү **3.** *разг., уст.* (*отговорить от чего-л.*) дүндереү, кире ҡағыу

**РАЗГОВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *с кем* и *без доп.* һөйләшеп китеү, һөйләшә башлау **2.** һүҙгә мауығып (бирелеп) китеү, сиселеү, әүрәү

**РАЗГОВО́РНИК** *м* һөйләшлек, һөйләшеү китабы (*тел өйрәнеү өсөн ҡулланма*)

**РАЗГОВО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*свойственный обиходной, устной речи*) һөйләү ...ы; **разгово́рный язы́к** һөйләү теле **2.** *в разн. знач.* һөйләшеү ...ы; **разгово́рная тру́бка** һөйләшеү трубкаһы; **разгово́рный жанр** һөйләшеү жанры; **разгово́рный уро́к** һөйләшеү дәресе

**РАЗГОВО́РЧИВОСТЬ** *ж* һүҙсәнлек, һүҙгә әүәҫлек, һүҙсән булыу

**РАЗГОВО́РЧИВЫЙ,** -ая, -ое һүҙсән, телдәр, телсән, һүҙгә әүәҫ; **разгово́рчивая де́вочка** телдәр ҡыҙыҡай

**РАЗГОВО́РЧИКИ** *мн.*; *разг.* һөйләнеү, буш һүҙ; **прекрати́ть разгово́рчики!** һөйләнеүҙәрҙе туҡтатырға!

**РАЗГО́Н** *м* **1.** *см.* **разогна́ть — разгоня́ть, разогна́ться — разгоня́ться**; **разго́н демонстра́ции** демонстрацияны таратыу **2.** (*разбег*) йүгереп килеп; **прыжо́к с разго́на** йүгереп килеп һикереү **3.** *спец.* (*промежуток между однородными предметами*) ара, алыҫлыҡ; **разго́н ме́жду столба́ми** бағаналар араһы ♦ **в разго́не** *в знач. сказ.* барыһы ла сығып киткәндәр, барыһы ла юлдалар; **с разго́на (разго́ну)** йүгереп килеп, сабып барған килеш

**РАЗГО́НИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* һирәк, аралы; **писа́ть разго́нистым по́черком** һирәк итеп яҙыу

**РАЗГО́НКА** *ж* **1.** *разг. см.* **разогна́ть — разгоня́ть** 1, 3, 5, **разогна́ться — разгоня́ться 2.** *тех.* сүкеп киңәйтеү **3.** *спец.* ҡабат (ҡат-ҡат) ҡыуыу

**РАЗГОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **разогна́ть**

**РАЗГОНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разогна́ться 2.** *страд. от* **разгоня́ть**

**РАЗГОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **разгороди́ть**

**РАЗГОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разгороди́ться 2.** *страд. от* **разгора́живать**

**РАЗГОРА́ТЬСЯ** *несов. см.* **разгоре́ться**

**РАЗГОРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** янып китеү, шәп (яҡшы, ҡыҙыу, көслө) яна башлау; **дрова́ разгоре́лись** утын шәп янып китте **2.** янып (ҡыҙарып) китеү; **щёки разгоре́лись** биттәре ҡыҙарып киткән **3.** *перен.* (*оказаться охваченным всё усиливающимся чувством, стремлением*) ҡыйыу, ҡыйыуланыу, баҙнат итеү **4.** *перен.* ҡыҙыу, ҡыҙып китеү; **бой разгоре́лся** һуғыш ҡыҙып китте; **спор разгоре́лся** бәхәс ҡыҙҙы ♦ **глаза́ (и зу́бы) разгоре́лись** *разг.* күҙҙәре янып китте

**РАЗГОРОДИ́ТЬ** *сов. что*; *в разн. знач.* бүлеү, бүлеп (кәртәләп) ҡуйыу; **разгороди́ть амба́р** амбарҙы бүлеү; **разгороди́ть сад** баҡсаны кәртәләп ҡуйыу

**РАЗГОРОДИ́ТЬСЯ** *сов.* (*перегородкой*) бүленеү; **разгороди́ться с сосе́дями** күршеләрҙән бүленеү

**РАЗГОРЯЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡыҙҙырыу, ҡыҙҙырып ебәреү **2.** *перен.* ярһытыу, ҡыҙҙырыу; **разгорячи́ть ло́шадь** атты ярһытыу

**РАЗГОРЯЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡыҙыу, эҫеләү, ҡыҙып (эҫергәнеп) китеү (алыу); **разгорячи́ться от рабо́ты** эштән ҡыҙып китеү **2.** *перен.* ярһып

(ҡыҙып, ҡуҙғып) китеү; **разгоряч́иться от сп́ора** бәхәстән ҡыҙып китеү

**РАЗГРА́БИТЬ** *сов. что* талау, талап алыу; **разгра́бить иму́щество** мөлкәтте талау

**РАЗГРАБЛЕ́НИЕ** *с см.* **разгра́бить**; **разграбле́ние обо́за** ылауҙы талау

**РАЗГРАНИЧЕ́НИЕ** *с см.* **разграни́чить**, **разграни́читься**; **разграниче́ние земе́льных уча́стков** ер участкаларын сикләү; **разграниче́ние полномо́чий** вәкәләтлектәрҙе айырыу

**РАЗГРАНИ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **разграни́чить**

**РАЗГРАНИ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разграни́читься 2.** *страд. от* **разграни́чивать**

**РАЗГРАНИЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сик, сикләү ...ы, сикләүсе, бүлеү ...ы, бүлә (сикләй) торған; **разграничи́тельная ли́ния** сикләүсе һыҙыҡ

**РАЗГРАНИ́ЧИТЬ** *сов. что* **1.** сикләү, айырыу, бүлеү, сиген билдәләү; **разграни́чить райо́ны** райондарҙың сиген билдәләү; **разграни́чить зе́мли** ерҙәрҙе бүлеү; **разграни́чить обя́занности** бурыстарҙы сикләү **2.** аныҡлау, асыҡлау; **разграни́чить поня́тия** төшөнсәләрҙе асыҡлау

**РАЗГРАНИ́ЧИТЬСЯ** *сов.* сикләнеү, айырылыу, асыҡланыу, бүленеү; **обя́занности разграни́чились** бурыстар асыҡланды

**РАЗГРАФИ́ТЬ** *сов. что* һыҙып (графалап) сығыу, графаларға бүлеп сығыу, графалап һыҙыу; **разграфи́ть бума́гу** ҡағыҙҙы графалап һыҙыу

**РАЗГРАФЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **разграфи́ть**

**РАЗГРЕБА́ТЬ** *несов. см.* **разгрести́**

**РАЗГРЕСТИ́** *сов. что* таратыу, көрәү, таратып (көрәп) ташлау; **разгрести́ се́но** бесән таратыу; **разгрести́ снег** ҡар көрәп ташлау

**РАЗГРО́М** *м* **1.** тар-мар итеү (ителеү); **разгро́м врага́** дошманды тар-мар итеү **2.** (*разрушение, опустошение, разорение*) емерелеү, таланыу, ҡыйралыш; **разгро́м го́рода** ҡаланың емерелеүе **3.** *разг.* (*полный беспорядок*) тәртипһеҙлек, бола; **в ко́мнате разгро́м** бүлмәлә тәртипһеҙлек

**РАЗГРОМИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тар-мар итеү; **разгроми́ть вра́жескую а́рмию** дошман ғәскәрен тар-мар итеү **2.** емереү, ҡыйратыу, туҙҙырыу, болартыу, юҡҡа сығарыу; **разгроми́ть организа́цию** ойошманы юҡҡа сығарыу

**РАЗГРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **разгрузи́ть**

**РАЗГРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разгрузи́ться 2.** *страд. от* **разгружа́ть**

**РАЗГРУЗИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (йөгөн) бушатыу; **разгрузи́ть ваго́н** вагон бушатыу; **разгрузи́ть парохо́д** пароходтың йөгөн бушатыу **2.** *перен.* бушата төшөү, эште аҙайтыу (кәметеү); **разгрузи́ть сотру́дника** хеҙмәткәрҙең эшен кәметеү

**РАЗГРУЗИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (йөгөнән) бушау, бушаныу; **парохо́д разгрузи́лся** пароходтың йөгө бушаны **2.** *перен.* (эштән) бушау, (бер аҙ) бушаңҡырау, эш кәмеү

**РАЗГРУ́ЗКА** *ж см.* **разгрузи́ть** – **разгружа́ть**; **организова́ть разгру́зку ваго́нов** вагондар бушатыуҙы ойоштороу

**РАЗГРУ́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое йөк бушатыу ...ы, йөк бушата торған; **разгру́зочная брига́да** йөк бушатыу бригадаһы; **разгру́зочные рабо́ты** йөк бушатыу эштәре ♦ **разгру́зочный день** ашауҙы кәметеү көнө

**РАЗГРУППИРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* төркөмдәргә бүлеү

**РАЗГРУППИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* төркөмдәргә бүленеү

**РАЗГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **разгры́зть**

**РАЗГРЫ́ЗТЬ** *сов. что* (тешләп) ватыу, ярыу, кимереү; **разгры́зть оре́х** сәтләүекте тешләп ватыу; **разгры́зть кость** һөйәк кимереү

**РАЗГРЫ́ЗТЬСЯ** *сов.* (тешләп) ватылыу, ярылыу, кимерелеү

**РАЗГУ́Л** *м* **1.** (*кутёж*) типтереү, кәйеф-сафа; **предава́ться разгу́лу** кәйеф-сафаға бирелеү **2.** ҡотороноу, шашыу; **разгу́л реа́кции** реакцияның ҡотороноуы

**РАЗГУ́ЛИВАТЬ I** *несов. см.* **разгуля́ть**

**РАЗГУ́ЛИВАТЬ II** *несов.* (*гулять не спеша*) йөрөү, урам тапау; **разгу́ливать по па́рку** парк буйлап йөрөү

**РАЗГУ́ЛИВАТЬСЯ** *несов. см.* **разгуля́ться**

**РАЗГУ́ЛЬЕ** *с*; *разг.* күңел асыу, кәйеф-сафа ҡороу, уйын-көлкө; **пра́здничное разгу́лье** байрам уйын-көлкөһө

**РАЗГУ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* уйын-көлкөлө; **разгу́льная жизнь** уйын-көлкөлө тормош

**РАЗГУЛЯ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что* йоҡоһон асыу, йоҡоһон ҡасырыу (осороу); **разгуля́ть ребёнка** баланың йоҡоһон ҡасырыу **2.** *что* (*развеять*) таратыу, юҡҡа сығарыу; **разгуля́ть тоску́** һағышты таратыу

**РАЗГУЛЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* типтерә башлау, аҙып китеү **2.** (*развернуться*) иркенләп (кинәнеп) эш итеү, йәйелеп китеү, киң ҡолас алыу; **не́где разгуля́ться** иркенләп эш итергә форсат юҡ **3.** (*о реке, буре, ветре, волнах*) көсәйеү, көсәйеп китеү, шашыу, ҡотороноу; **во́лны разгуля́лись** тулҡындар ҡоторондо **4.** йоҡо асылыу, йоҡо ҡасыу (осоу); **ребёнок разгуля́лся** баланың йоҡоһо асылды **5.** аяҙытыу, шыңҡыу, асылып китеү; **пого́да разгуля́лась** көн аяҙытты

**РАЗДАВА́ТЬ I** *несов. см.* **разда́ть** I

**РАЗДАВА́ТЬ II** *несов. см.* **разда́ть** II

**РАЗДАВА́ТЬСЯ I** *несов. см.* **разда́ться** I

**РАЗДАВА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **разда́ться** II **2.** *страд. от* **раздава́ть** II

**РАЗДАВА́ТЬСЯ III** *несов. страд. от* **раздава́ть** I

**РАЗДАВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (тапап) иҙеү, һытыу, тапау; **раздави́ть помидо́ры** поми-

дорҙарҙы һытыу **2.** тапатып имгәтеү (үлтереү) **3.** *кого-что*; *перен.* тар-мар итеү, юҡ итеү; **раздави́ть врага́** дошманды юҡ итеү **4.** *перен.* баҫыу, рухын төшөрөү, киҫгәтеү; **тоска́ раздави́ла его́** уны һағыш баҫты

**РАЗДА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **раздави́ть**

**РАЗДА́ИВАТЬ** *несов. см.* **раздо́ить**

**РАЗДА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раздои́ться** **2.** *страд. от* **разда́ивать**

**РАЗДА́ЛБЛИВАТЬ** *несов. см.* **раздолби́ть**

**РАЗДА́РИВАТЬ** *несов. см.* **раздари́ть**

**РАЗДАРИ́ТЬ** *сов. кого-что* бүләк итеү, бүләк итеп таратыу (өләшеп бөтөү); **раздари́ть игру́шки** бүләк итеп уйынсыҡтарҙы таратыу

**РАЗДА́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое таратыу ...ы, өләшеү ...ы, таратыла (өләшә) торған; **разда́точный материа́л** таратыла торған материал

**РАЗДА́ТЧИК** *м* и **РАЗДА́ТЧИЦА** *ж* таратыусы, өләшеүсе

**РАЗДА́ТЬ I** *сов. кого-что* таратыу, өләшеү, таратып (өләшеп) биреү; **разда́ть де́ньги** аҡса таратыу; **разда́ть пода́рки** бүләк өләшеү

**РАЗДА́ТЬ II** *сов. что*; *прост.* киңәйтеү, киреү, тарттырыу, тартып киңәйтеү; **разда́ть сапоги́ на коло́дке** итекте ҡалыпта тарттырыу

**РАЗДА́ТЬСЯ I** *сов.* яңғырау, ишетелеү, яңғырап (ишетелеп) китеү; **разда́лся вы́стрел** атыу тауышы ишетелде; **разда́лся го́лос** тауыш яңғыраны

**РАЗДА́ТЬСЯ II** *сов.* **1.** юл биреү, ике яҡҡа айырылыу; **толпа́ раздала́сь** төркөм ике яҡҡа айырылды **2.** *разг.* киңәйеү, иркенәйеү; **сапоги́ раздали́сь** итек киңәйҙе **3.** *разг.* йыуанайыу, ҡалынайыу, йыуанайып (ҡалынайып) китеү; **разда́ться в плеча́х** яурын (ҡулбаш) ҡалынайыу

**РАЗДА́ЧА** *ж см.* **разда́ть** — **раздава́ть** I; **разда́ча де́нег** аҡса таратыу

**РАЗДВА́ИВАТЬ** *несов. см.* **раздвои́ть**

**РАЗДВА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раздвои́ться** **2.** *страд. от* **раздва́ивать**

**РАЗДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **раздви́нуть**

**РАЗДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раздви́нуться** **2.** асылыу, һуҙылыу, тартып киңәйтеү; **стол раздвига́ется** өҫтәл тартып киңәйтелә **3.** *страд. от* **раздвига́ть**

**РАЗДВИЖНО́Й,** -ая, -ое асылмалы, һуҙылмалы, киңәйтелмәле; **раздвижно́й стол** киңәйтелмәле өҫтәл

**РАЗДВИ́НУТЬ** *сов. что* **1.** айырыу, ике яҡҡа асыу, асып ҡуйыу; **раздви́нуть занаве́ски** пәрҙәләрҙе асып ҡуйыу **2.** этеү, шылдырыу, этеп (шылдырып) ҡуйыу; **раздви́нуть сту́лья** ултырғыстарҙы шылдырыу **3.** *кого* ике яҡҡа айырыу; **раздви́нуть толпу́** халыҡты ике яҡҡа айырыу **4.** тартып һуҙыу (йәйеү); **раздви́нуть стол** өҫтәлде тартып һуҙыу

**РАЗДВИ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** асылыу, айырылыу, асылып (айырылып) китеү; **за́навес раздви́нулся** шаршау асылды **2.** икегә айырылыу, юл биреү; **наро́д раздви́нулся** халыҡ юл бирҙе **3.** киңәйеп китеү, иркенәйеү; **горизо́нт раздви́нулся** офоҡ киңәйеп китте

**РАЗДВОЕ́НИЕ** *с см.* **раздвои́ть, раздвои́ться**; **раздвое́ние доро́ги** юлдың икегә айырылыуы

**РАЗДВО́ЕННОСТЬ** *ж* икегә айырылғанлыҡ (бүленгәнлек), икеләнеү; **раздво́енность внима́ния** иғтибарҙың икегә бүленгәнлеге

**РАЗДВО́ЕННЫЙ** и **РАЗДВОЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **раздвои́ть** **2.** *прил.* айыры, асалы, икегә бүленгән; **раздво́енное копы́то** айыры тояҡ; **раздво́енная борода́** айыры һаҡал **3.** *прил.*; *перен.* билдәһеҙ, икеле, икеле-микеле; **раздво́енная жизнь** билдәһеҙ тормош

**РАЗДВОИ́ТЬ** *сов. что* икегә айырыу (бүлеү), икегә ярыу; **раздвои́ть коло́нну** колоннаны икегә бүлеү

**РАЗДВОИ́ТЬСЯ** *сов.* икегә айырылыу (бүленеү), асаланыу; **доро́га раздвои́лась** юл икегә айырылды

**РАЗДЕВА́ЛКА** *разг.* и **РАЗДЕВА́ЛЬНЯ** *ж* сисенеү бүлмәһе

**РАЗДЕВА́НИЕ** *с см.* **раздева́ть, раздева́ться**

**РАЗДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **разде́ть**

**РАЗДЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разде́ться** **2.** *страд. от* **раздева́ть**

**РАЗДЕ́Л** *м* **1.** *см.* **раздели́ть** 1 — **разделя́ть, раздели́ться** 3 — **разделя́ться**; **разде́л иму́щества** мөлкәт бүлеү **2.** бүлек; **разде́л кни́ги** китаптың бүлеге; **разде́л фи́зики** физиканың бүлеге **3.** (*граница между чем-л.*) сик, айыра

**РАЗДЕ́ЛАТЬ** *сов. что* **1.** (*обработать*) эшкәртеү, әҙерләү, яһау; **разде́лать гря́дку** түтәл яһау; **разде́лать мясну́ю ту́шку** ит түшкәһен эшкәртеү **2.** *подо что* оҡшатып яһау (эшләү); **разде́лать под дуб** имән ағасына оҡшатып яһау **3.** *перен.*, *прост.* (*разругать, избить, повредить*) пыр туҙҙырыу, тиргәп (әрләп, туҡмап) ташлау ♦ **разде́лать под оре́х** *см.* **оре́х**

**РАЗДЕ́ЛАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** *с кем-чем* (*покончить*) ҡотолоу, арыныу; **разде́латься с долга́ми** бурыстарҙан ҡотолоу; **разде́латься с поруче́ниями** йомоштарҙан арыныу **2.** *с кем*; *перен.* (*свести счёты*) үс алыу, ҡонон ҡайтарыу, кәрәген биреү; **разде́латься с оби́дчиком** рәнйетеүсенән үс алыу

**РАЗДЕЛЕ́НИЕ** *с см.* **раздели́ть** — **разделя́ть, раздели́ться** — **разделя́ться**; **разделе́ние труда́** хеҙмәт бүленеше; **разделе́ние о́бласти на райо́ны** өлкәнең райондарға бүленеүе

**РАЗДЕЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бүлеү ...ы, айырыу ...ы, бүлгес ...ы, бүлеүсе, айырғыс, бүлә (айыра) торған; **раздели́тельный знак** айырыу билдәһе; **раздели́тельная черта́** айырыу һыҙығы; **раздели́тельная бума́га** айырғыс ҡағыҙ ♦ **раздели́тельный сою́з** *грам.* бүлеү теркәүесе

**РАЗДЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** бүлеү, бүлеп сығыу (биреү); **раздели́ть на ра́вные ча́сти** тигеҙ өлөштәргә бүлеү **2.** айырыу, айырып тороу; **толпа́ их раздели́ла** халыҡ төркөмө уларҙы айырҙы **3.** уртаҡлашыу, бүлешеү; **раздели́ть обе́д с дру́гом** төшкө ашты дуҫың менән уртаҡлашыу **4.** ҡушылыу, уртаҡлашыу, ризалашыу; **раздели́ть мне́ние** *чьё-л. кемдеңдер* фекеренә ҡушылыу **5.** *мат.* бүлеү

**РАЗДЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** айырылыу, икегә айырылыу; **тропи́нка раздели́лась** һуҡмаҡ икегә айырылды **2.** бүленеү, бүленешеү; **отря́д раздели́лся на три гру́ппы** отряд өс төркөмгә бүленде **3.** (*разделить имущество между собой*) айырылып сығыу, бүленешеү, мал бүлешеү; **раздели́ться с бра́том** ағай менән бүленешеү **4.** *мат.* бүленеү

**РАЗДЕ́ЛКА** *ж* **1.** *см.* **разде́лать** 1, 2 — **разде́лывать**; **разде́лка гря́дки** түтәлдәр яһау; **разде́лка шка́фа под дуб** шкафты имәнгә оҡшатып эшкәртеү **2.** *спец.* кирбес менән көпләү **3.** *спец.* эшләнеш **4.** *уст.* (*развязка*) һуңғы сик, сиселем

**РАЗДЕ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое эшкәртеү ...ы, эшкәртә торған ...ы, әҙерләү ...ы, турағыс ...ы; **разде́лочные рабо́ты** әҙерләү эштәре; **разде́лочный цех** эшкәртеү цехы; **разде́лочная доска́** турағыс таҡта

**РАЗДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **разде́лать**

**РАЗДЕ́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разде́латься 2.** *страд. от* **разде́лывать**

**РАЗДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** айырым; **разде́льное житьё** айырым йәшәү; **разде́льное написа́ние** айырым яҙыу; **разде́льная убо́рка** айырым урып һуғыу **2.** (*чёткий, с паузой*) асыҡ, аныҡ, өҙөп-өҙөп, өҙөк-өҙөк; **разде́льное произноше́ние** асыҡ әйтелеш; **разде́льные вы́стрелы** өҙөк-өҙөк атыу тауышы

**РАЗДЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **раздели́ть** 1—4

**РАЗДЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раздели́ться** 1—3; **2.** бүленеү, айырылыу; **зву́ки разделя́ются на гла́сные и согла́сные** өндәр һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға бүленә **3.** *страд. от* **разделя́ть**

**РАЗДЁРГАТЬ** *сов. что*; *разг.* тартып сығарыу, йолҡоу, йолҡҡолау, йолҡоп бөтөрөү; **раздёргать лоску́т на ни́тки** ҡораманы йолҡҡолау

**РАЗДЁРГИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **раздёргать 2.** *см.* **раздёрнуть**

**РАЗДЁРНУТЬ** *сов. что*; *разг.* тартыу, тартып асыу; **раздёрнуть занаве́ски** ҡорманы тартып асыу

**РАЗДЕ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разде́ть 2.** *прил.* кейемһеҙ, кейенмәйенсә, сисенгән; **вы́йти на у́лицу разде́тым** урамға кейенмәйенсә сығыу

**РАЗДЕ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** сисендереү, кейемен һалдырыу; **разде́ть ребёнка** баланың кейемен һалдырыу **2.** (*ограбить*) *разг.* кейемен һалдырып алыу, сисендереү, талау

**РАЗДЕ́ТЬСЯ** *сов.* сисенеү, өҫтө (кейемде) һалыу

**РАЗДИРА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **разодра́ть 2.** *перен.* өҙгөләү, бүлгеләү, тарҡатыу; **раздира́ть о́бщество** йәмғиәтте тарҡатыу **3.** *перен.* телгеләү, әрнетеү, өҙгөләү; **тоска́ раздира́ет се́рдце** һағыш йөрәкте әрнетә

**РАЗДИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разодра́ться** 1; **2.** *страд. от* **раздира́ть**

**РАЗДИРА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **раздира́ть 2.** *прил.* йөрәк өҙгөс (әрнеткес); **раздира́ющий крик** йөрәк өҙгөс тауыш

**РАЗДОБРЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* тулыланыу, йыуанайыу, тулыланып (һимереп, йыуанайып) китеү

**РАЗДО́БРИТЬ** *сов. кого*; *разг.* күңелен йомшартыу, йомартландырыу

**РАЗДО́БРИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күңел йомшарыу, йомартланыу, күңел йомшарып китеү, йомартланып китеү

**РАЗДОБЫВА́ТЬ** *несов. см.* **раздобы́ть**

**РАЗДОБЫ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* табып алыу, эҙләп табыу, ҡулға төшөрөү; **раздобы́ть ну́жную кни́гу** кәрәкле китапты табып алыу

**РАЗДОИ́ТЬ** *сов. кого-что* эйҙереү, һауып һөт төшөрөү, һөтөн (һауымын) арттырыу; **раздои́ть козу́** һауып кәзәгә һөт төшөрөү

**РАЗДОИ́ТЬСЯ** *сов.* эйеү, һөтө төшөү (артыу, күбәйеү)

**РАЗДО́Й** *м см.* **раздои́ть**

**РАЗДОЛБИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (соҡоп) киңәйтеү (ҙурайтыу); **раздолби́ть отве́рстие ло́мом** тишекте лом менән ҙурайтыу **2.** соҡоп ватыу (емереү), соҡоп боҙоу

**РАЗДО́ЛЬЕ** *с* **1.** киңлек, иркенлек; **степно́е раздо́лье** дала киңлеге **2.** иркенлек, иркен тормош; **в дере́вне де́тям раздо́лье** ауылда балаларға иркенлек

**РАЗОБЛАЧЕ́НИЕ** *с см.* **разоблачи́ть – разоблача́ть**

**РАЗОБЛАЧИ́ТЕЛЬ** *м* фашлаусы; **разоблачи́тель вра́жеских за́мыслов** дошмандарҙың ниәтен фашлаусы

**РАЗОБЛАЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое фаш иткес, фаш итә торған, фашлаусы; **разоблачи́тельные све́дения** фаш иткес мәғлүмәттәр

**РАЗОБЛАЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого*; *церк.* ғибәҙәт кейемен һалдырыу (сисендереү) **2.** *кого*; *шутл.* (*раздеть*) өҫтөн һалдырыу, сисендереү **3.** *кого-что* (*раскрыть, обнаружить*) фашлау, фаш итеү; **разоблачи́ть преда́теля** хыянатсыны фашлау

**РАЗОБЛАЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *церк.* ғибәҙәт кейемен һалыу **2.** *шутл.* сисенеү, кейемде һалыу **3.** фашланыу, фаш ителеү, йөҙө асылыу

**РАЗОБРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*взять по частям*) алып бөтөү **2.** *что* (*раскупить*) һатып алып бөтөү, алып бөтөү; **разобра́ть весь това́р** бөтә тауарҙы һатып алып бөтөү **3.** *что* (*привести в*

*порядок*) рәткә һалыу, тәртипкә килтереү; **разобра́ть ве́щи** әйберҙәрҙе тәртипкә килтереү **4.** *что* (*разъединить на части*) һүтеү, боҙоу, ҡутарыу, таратыу, тағатыу; **разобра́ть часы́** сәғәтте һүтеү; **разобра́ть печь** мейес боҙоу **5.** *что* (*выяснить, подвергнуть анализу*) тикшереү, асыҡлау, айышына төшөнөү, ҡарау; **разобра́ть вопро́с** мәсьәләне асыҡлау; **разобра́ть де́ло** эште ҡарау; **разобра́ть но́вую поэ́му** яңы поэманы тикшереү **6.** *что*; *грам.* тикшереү; **разобра́ть сло́во** һүҙҙе тикшереү; **разобра́ть предложе́ние по частя́м ре́чи** һөйләмде һүҙ төркөмдәре буйынса тикшереү **7.** *что* төшөнөү, аңлау, айырыу, белеү, таныу; **разобра́ть по́черк** яҙыуҙы таныу; **тут ничего́ не разберёшь** бында бер нәмә лә аңларлыҡ түгел **8.** *кого*; *разг.* (*о сильном чувстве, желании*) солғап алыу, уяныу, тыуыу; **его́ разобрала́ за́висть** унда көнләшеү тойғоһо уянды

**РАЗОБРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*привести в порядок свои вещи*) рәткә һалып ебәреү, тәртипкә килтереү **2.** *в ком-чём, с кем-чем* аңлау, төшөнөү, асыҡлау; **разобра́ться в вопро́се** мәсьәләгә төшөнөү; **разобра́ться в де́ле** эште асыҡлау **3.** *разг.* (*построиться*) теҙелеү, урынын табыу; **полк разобра́лся ро́тами** полк роталар буйынса теҙелде

**РАЗОБЩА́ТЬ** *несов. см.* **разобщи́ть**

**РАЗОБЩА́ТЬСЯ** *несов. см.* **разобщи́ться**

**РАЗОБЩЕ́НИЕ** *с см.* **разобщи́ть — разобща́ть, разобщи́ться — разобща́ться**

**РАЗОБЩЁННОСТЬ** *ж* айырымлыҡ, тарҡаулыҡ, бәйләнеш булмау; **подво́дит разобщённость** бәйләнеш булмау ҡырын һуға

**РАЗОБЩИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*разъединить*) айырыу, бәйләнеште өҙөү; **разобщи́ть вра́жеские си́лы** дошман көстәрен айырыу **2.** *перен.* (*сделать далёкими*) алыҫлаштырыу, ситләштереү; **э́та встре́ча разобщи́ла друзе́й** был осрашыу дуҫтарҙы ситләштерҙе

**РАЗОБЩИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*разъединиться*) айырылыу, икегә айырылыу, өҙөлөү, бүленеү **2.** (*перестать общаться*) айырылышыу, бәйләнеш өҙөлөү, алыҫлашыу, ситләшеү

**РА́ЗОВЫЙ,** -ая, -ое бер (генә) тапҡыр (файҙалана торған), бер тапҡыр файҙаланыу ...ы; **ра́зовый биле́т** бер тапҡыр файҙаланыу билеты; **ра́зовый сбор** бер тапҡыр йыйыу

**РАЗОГНА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*заставить разбежаться*) ҡыуыу, таратыу, ҡыуып (таратып) ебәреү; **разогна́ть ста́до** көтөүҙе ҡыуыу; **разогна́ть люде́й с пло́щади** кешеләрҙе майҙандан ҡыуып ебәреү **2.** (*развеять*) таратыу, ҡыуыу; **ве́тер разогна́л облака́** ел болоттарҙы таратты **3.** (*ликвидировать*) бөтөрөү, ябыу; **разогна́ть организа́цию** ойошманы ябыу **4.** *перен.* (*заставить исчезнуть, миновать*) таратыу, ҡыуыу; **разогна́ть тоску́** һағышты таратыу **5.** (*довести движение до большой скорости*) ярһытып ҡыуыу, артыҡ шәбәйтеү; **разогна́ть ло́шадь** атты ҡыуыу ♦ **разогна́ть кровь** ҡан таратыу

**РАЗОГНА́ТЬСЯ** *сов.* бик шәп барыу, тиҙлек арттырыу, йән-фарман барыу; **разогна́ться на велосипе́де** велосипедта йән-фарман барыу

**РАЗО́ГНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разогну́ть 2.** *прил.* яҙылған, яҙыҡ, һоноҡ; **разо́гнутая дуга́** яҙыҡ дуға; **разо́гнутая коса́** һоноҡ салғы

**РАЗОГНУ́ТЬ** *сов. кого-что* төҙәйтеү, турайтыу, яҙыу; **разогну́ть гво́зди** ҡаҙаҡтарҙы төҙәйтеү; **разогну́ть спи́ну** арҡаны яҙыу

**РАЗОГНУ́ТЬСЯ** *сов.* төҙәйеү, турайыу, яҙылыу

**РАЗОГРЕВА́НИЕ** *с см.* **разогрева́ть, разогрева́ться**

**РАЗОГРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **разогре́ть**

**РАЗОГРЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разогре́ться 2.** *страд. от* **разогрева́ть**

**РАЗОГРЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** йылытыу, эҫетеү; **разогре́ть обе́д** төшкө ашты йылытыу **2.** ҡыҙҙырыу; **разогре́ть мото́р** мотор ҡыҙҙырыу

**РАЗОГРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йылыныу, эҫеү; **суп разогре́лся** аш йылынды **2.** ҡыҙыу; **маши́на разогре́лась** машина ҡыҙҙы

**РАЗОДЕ́ТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **разоде́ть 2.** *прил.* ҡупшы (матур) кейенгән, кейенгән-яһанған; **разоде́тые зри́тели** ҡупшы кейенгән тамашасылар

**РАЗОДЕ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡупшы итеп (матур итеп) кейендереү; **разоде́ть ребёнка как ку́клу** баланы ҡурсаҡ кеүек матур итеп кейендереү

**РАЗОДЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* кейенеү, ҡупшы (матур) итеп кейенеү; **разоде́ться по-пра́здничному** байрамса кейенеү ♦ **разоде́ться в пух и прах** сын яһау итеп кейенеү

**РАЗО́ДРАННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **разодра́ть 2.** *прил.* йыртылып (өҙөлөп) бөткән; **разо́дранные брю́ки** йыртылып бөткән салбар

**РАЗОДРА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (*с силой разорвать на части*) йыртҡылап бөтөрөү, өҙгөләп ташлау, өҙгөләү, йыртҡылау; **разодра́ть кни́гу** китапты йыртҡылап ташлау; **орёл разодра́л за́йца** бөркөт ҡуянды өҙгөләп ташланы **2.** (*сделать дырку в чём-л.*) йыртыу, тишеү, йыртып (тишеп) сығарыу; **разодра́ть сапо́г** итекте йыртыу

**РАЗОДРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*разорваться*) йыртылыу, йыртылып (өҙөлөп) сығыу, йыртылып бөтөү; **руба́шка разодрала́сь** күлдәк йыртылып бөткән **2.** (*сильно подраться*) һуғышып китеү, һуғышыу; **два ма́льчика разодрали́сь** ике малай һуғышып китте

**РАЗОЗЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разозли́ть 2.** *прил.* асыулы, асыуланған; **разозлённый вид** асыулы ҡиәфәт

**РАЗОЗЛИ́ТЬ** *сов. кого* бик ныҡ асыуландырыу, асыуын ҡабартыу (килтереү); **э́та весть разозли́ла его́** был хәбәр уның асыуын ҡабартты

**РАЗОЗЛИ́ТЬСЯ** *сов.* бик ныҡ асыуланыу, асыу ҡабарыу

**РАЗОЙТИ́СЬ** *сов.* **1.** (*уйти в разные места*) таралыу, таралышыу; **го́сти разошли́сь** ҡунаҡтар таралды **2.** (*рассеяться*) таралыу, юғалыу; **ту́чи разошли́сь** болоттар таралды **3.** (*разгладиться*) бөтөү, яҙылыу; **морщи́ны разошли́сь** йыйырсыҡтар яҙылды **4.** (*раствориться, растаять*) иреү, иреп бөтөү; **са́хар разошёлся в ча́е** шәкәр сәйҙә иреп бөттө **5.** *с кем-чем* (*не встретиться в пути*) аймылышыу, аймылыш булыу, осрашмау; **разойти́сь в темноте́** ҡараңғыла аймылыш булыу **6.** бәйләнеште өҙөү, ташлашыу, айырылышыу; **друзья́ разошли́сь** дуҫтар бәйләнеште өҙҙө; **разойти́сь с жено́й** ҡатын менән айырылышыу **7.** (*не совпасть*) тура килмәү, айырылыу; **мне́ния разошли́сь** фекерҙәр тура килмәне **8.** (*разделиться на несколько частей*) айырылыу, тармаҡланыу; **доро́га разошла́сь на две** юл икегә айырылды **9.** (*разъединиться*) айырылып китеү, асылыу, (асылып) китеү; **швы разошли́сь** йөйҙәре киткән; **по́лы пальто́ разошли́сь** пальто сабыуҙары асылып китте **10.** (*оказаться раскупленным*) һатылып (таралып) бөтөү; **кни́ги бы́стро разошли́сь** китаптар тиҙ һатылып бөттө **11.** (*израсходоваться*) тотонолоп бөтөү; **де́ньги разошли́сь** аҡса тотонолоп бөттө **12.** (*распространиться*) таралыу; **весть разошла́сь** хәбәр таралды **13.** көсәйеп (шәбәйеп) китеү; **дождь разошёлся** ямғыр көсәйеп китте **14.** (*приобрести бо́льшую скорость*) шәбәйеп (ҡыҙып, ҡыҙыулап) китеү, шәбәйеү; **ло́шадь разошла́сь** ат ҡыҙыулап китте **15.** *перен.* (*увлечься*) ярһыу, ҡыҙыу, ярһып (ҡыҙып) китеү; **танцо́р разошёлся** бейеүсе ҡыҙып китте

**РАЗО́К** *м*; *разг.*, *ласк.* *от* **раз**

**РА́ЗОМ** *нареч.*; *разг.* **1.** (*одновременно*) бер юлы, дәррәү; **подня́ться ра́зом** дәррәү ҡуҙғалыу **2.** (*в один приём*) бер юлы, бер ултырыуҙа; **проче́сть всё ра́зом** бер ултырыуҙа уҡып сығыу **3.** (*сразу, мгновенно*) шунда уҡ, бик тиҙ, күҙ асып йомғансы

**РАЗО́МКНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* *от* **разомкну́ть 2.** *прил.*; *воен.* һирәгәйтелгән; **разо́мкнутый строй** һирәгәйтелгән саф

**РАЗОМКНУ́ТЬ** *сов.* *что* **1.** (*разъединить*) өҙөү, ысҡындырыу, өҙөп (ысҡындырып) ҡуйыу; **разомкну́ть цепь** сылбырҙы өҙөү **2.** (*раздвинуть*) айырыу, асыу; **разомкну́ть воро́та шлю́за** шлюздың ҡапҡаларын асыу; **враг разомкну́л полки́** дошман полктарҙы айырҙы **3.** *воен.* һирәгәйтеү; **разомкну́ть шере́нгу** сафты һирәгәйтеү **4.** асыу (*күҙҙе, иренде*); **разомкну́ть ве́ки** күҙ ҡабағын асыу

**РАЗОМКНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** өҙөлөү, ысҡыныу; **ру́ки разомкну́лись** ҡулдар ысҡынды **2.** айырылыу, асылыу; **ряды́ разомкну́лись** рәттәр айырылды **3.** *воен.* (*образовать интервалы — о построении*) һирәгәйеү, араланыу **4.** асылыу; **гу́бы разомкну́лись** ирендәр асылды

**РАЗОМЛЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* хәлһеҙләнеү, әлһерәү; **разомле́ть от жары́** эҫегә әлһерәү

**РАЗОНРА́ВИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оҡшамай башлау

**РАЗОПРЕВА́ТЬ** *несов.* *см.* **разопре́ть**

**РАЗОПРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** бығыу, иҙелеп бешеү; **ка́ша разопре́ла** бутҡа быҡҡан **2.** *прост.* (*сильно вспотеть*) бышлығыу, манма (шыбыр) тир булыу

**РАЗО́Р** *м*; *разг.* **1.** емереклек, хараба; **круго́м был разо́р и беспоря́док** тирә-яҡта емереклек һәм тәртипһеҙлек ине **2.** (*полное обнищание*) бөлгөнлөк, хәйерселек; **в разо́р разори́ть** хәйерселеккә төшөрөү

**РАЗОРА́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* **1.** аҡырыныу, ҡысҡырыныу **2.** *на кого* ҡысҡырып әрләшә башлау (әрләү)

**РАЗО́РВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* *от* **разорва́ть 2.** *прил.* йыртылған, йыртыҡ; **разо́рванный чуло́к** йыртыҡ ойоҡ; **разо́рванное письмо́** йыртылған хат **3.** *прил.* өҙөк-өҙөк, бәйләнешһеҙ; **разо́рванные фра́зы** бәйләнешһеҙ һүҙҙәр

**РАЗОРВА́ТЬ** *сов.* *кого-что* **1.** йыртыу, йыртып ташлау, өҙөү, өҙөп ташлау, йыртҡылап (өҙгөләп) ташлау; **разорва́ть попола́м** уртаға йыртыу; **разорва́ть в кло́чья** киҫәктәргә йыртҡылап ташлау; **разорва́ть цепь** сылбырҙы өҙөү **2.** (*взрывом разнести на части*) шартлатыу; **котёл разорва́ло** *безл.* ҡаҙан шартлаған; **разорва́ть скалу́ динами́том** ҡаяны динамит менән шартлатыу **3.** *перен.* өҙөү, туҡтатыу; **разорва́ть дипломати́ческие отноше́ния** дипломатик мөнәсәбәттәрҙе өҙөү; **разорва́ть догово́р** килешеүҙе өҙөү **4.** (*растерзать*) ботарлау, ботарлап ташлау ♦ **чтоб тебя́ разорва́ло** *прост.*, *бран.* ҡаҙалып (сәсрәп) киткере

**РАЗОРВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йыртылыу, йыртылып китеү; **карма́н разорва́лся** кеҫә йыртылды **2.** (*разделиться на части*) шартлау, ярылыу; **снаря́д разорва́лся** снаряд шартланы **3.** өҙөлөү, өҙөлөп китеү; **верёвка разорвала́сь** бау өҙөлдө **4.** *перен.* (*прекратиться*) өҙөлөү, туҡтау; **дру́жба разорвала́сь** дуҫлыҡ өҙөлдө ♦ **разорва́ться на ча́сти** ныҡ өҙгөләнеү; **хоть разорви́сь!** шартлаһаң да!

**РАЗОРЕ́НИЕ** *с* *см.* **разори́ть**, **разори́ться**

**РАЗОРИ́ТЕЛЬ** *м* и **РАЗОРИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* бөлдөрөүсе, талаусы, бөлгөнлөккә төшөрөүсе

**РАЗОРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бөлдөргөс, бөлдөрә торған; **разори́тельные тра́ты** бөлдөргөс сығымдар

**РАЗОРИ́ТЬ** *сов.* *кого-что* **1.** (*довести до нищеты*) бөлдөрөү, бөлгөнлөккә (хәйерселеккә) төшөрөү; **разори́ть дере́вню** ауылды бөлгөнлөккә төшөрөү **2.** (*разрушить*) емереү, ҡыйратыу, туҙҙырыу; **разори́ть пти́чье гнездо́** ҡош ояһын туҙҙырыу

**РАЗОРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бөлөү, бөлгөнлөккә (хәйерселеккә) төшөү, мөлкәтһеҙ ҡалыу; **предпринима́тель разори́лся** эшҡыуар бөлдө **2.** *разг.* (аҡса) тотоноу; **разори́ться на сто рубле́й** йөҙ һум тотоноу

**РАЗОРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **разоружи́ть**

**РАЗОРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разоружи́ться 2.** *страд. от* **разоружа́ть**

**РАЗОРУЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **разоружи́ть** – **разоружа́ть**, **разоружи́ться** – **разоружа́ться**; **разоруже́ние а́рмии проти́вника** дошман ғәскәрен ҡоралһыҙландырыу **2.** ҡоралһыҙланыу; **всео́бщее и по́лное разоруже́ние** дөйөм һәм тулы ҡоралһыҙланыу; **борьба́ за разоруже́ние** ҡоралһыҙланыу өсөн көрәш

**РАЗОРУЖИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *прям.*, *перен.* ҡоралһыҙландырыу; **разоружи́ть ро́ту** ротаны ҡоралһыҙландырыу; **иде́йно разоружи́ть** идея яғынан ҡоралһыҙландырыу **2.** (*лишить средств вооружения – о военных укреплениях, судах и т.п.*) ҡоралдарҙы алыу; **разоружи́ть кре́пость** нығытманан ҡоралдарҙы алыу **3.** *мор.* ҡорамалдарын алыу (*судноның*)

**РАЗОРУЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *прям.*, *перен.* ҡоралһыҙланыу, ҡорал ташлау; **враг разоружи́лся** дошман ҡорал ташланы; **иде́йно разоружи́ться** идея яғынан ҡоралһыҙланыу **2.** орудиеларҙы (ҡоралды) алыу; **кре́пость разоружи́лась** нығытманан орудиелар алынды

**РАЗОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **разори́ть**

**РАЗОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разори́ться 2.** *страд. от* **разоря́ть**

**РАЗОСЛА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** таратыу, төрлө яҡҡа ебәреү; **разосла́ть пи́сьма** төрлө яҡҡа хаттар ебәреү; **разосла́ть пригласи́тельные биле́ты** саҡырыу билеттары таратыу **2.** (*отправить всех или всё*) ебәреү, ебәреп бөтөрөү; **разосла́ть всех курье́ров** курьерҙарҙың бөтәһен дә ебәреү

**РАЗОСПА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бик ҡаты һәм оҙаҡ йоҡлау

**РАЗОСТЛА́ТЬ** *сов. что* **1.** түшәү, йәйеү; **разостла́ть ска́терть** ашъяулыҡ йәйеү; **разостла́ть пала́с** балаҫ түшәү **2.** (*разложить тонким слоем по поверхности*) таратып йәйеү, йәйеп һалыу **3.** *перен.* һуҙыу, таратыу; **разостла́ть траву́ для су́шки** үләнде киптерергә таратыу

**РАЗОСТЛА́ТЬСЯ** *сов.* йәйелеү, түшәлеү; **тума́н разостла́лся по земле́** томан ер өҫтөнә түшәлгән

**РАЗОТКА́ТЬ** *сов. что*; *текст.* биҙәкләп (нағышлап) туҡыу

**РАЗОТКРОВЕ́ННИЧАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* сер сисеү, асыҡтан-асыҡ (туранан-тура) һөйләп биреү

**РАЗО́ХАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ахылдарға тотоноу, ахылдығы сығыу

**РАЗОХО́ТИТЬ** *сов. кого*; *разг.* дәртләндереү, елкендереү, теләк уятыу

**РАЗОХО́ТИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* дәртләнеп (елкенеп) китеү, теләк уяныу, ҡыҙығып (әүәҫләнеп) китеү

**РАЗОЧАРОВА́НИЕ** *с* **1.** (*чувство неудовлетворённости*) күңел ҡайтыу (һүрелеү), төңөлөү, ҡәнәғәтһеҙлек; **глубо́кое разочарова́ние** тәрән ҡәнәғәтһеҙлек **2.** (*потеря веры в кого-что-л.*) ышаныс бөтөү (юғалыу), өмөт өҙөлөү; **разочарова́ние в дру́ге** дуҫҡа ышаныс бөтөү; **разочарова́ние в жи́зни** тормоштан өмөт өҙөлөү

**РАЗОЧАРО́ВАННОСТЬ** *ж* өмөтһөҙлөк, ҡәнәғәтһеҙлек, төңөлгәнлек; **разочаро́ванность в бу́дущем** киләсәккә өмөтһөҙлөк

**РАЗОЧАРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разочарова́ть 2.** *прил.* хыялы юҡҡа сыҡҡан, ышанысы юғалған, өмөтө өҙөлгән; **разочаро́ванный челове́к** ышанысы юғалған кеше

**РАЗОЧАРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* күңелен ҡайтарыу, өмөтөн өҙөү, ышанысын бөтөрөү (юғалтыу); **разочарова́ть друзе́й** дуҫтарҙың күңелен ҡайтарыу

**РАЗОЧАРОВА́ТЬСЯ** *сов.* күңел ҡайтыу (һүрелеү), өмөт өҙөлөү, ышаныс бөтөү (юғалыу); **разочарова́ться в бли́зких** яҡындарға ышаныс юғалыу

**РАЗОЧАРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **разочарова́ть**

**РАЗОЧАРО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разочарова́ться 2.** *страд. от* **разочаро́вывать**

**РАЗРАБА́ТЫВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **разрабо́тать 2.** табыу, (эшләп) сығарыу; **разраба́тывать известня́к** эзбиз сығарыу

**РАЗРАБА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разрабо́таться 2.** *страд. от* **разраба́тывать**

**РАЗРАБО́ТАТЬ** *сов. что* **1.** эшкәртеү, әҙерләү; **разрабо́тать зе́млю** ерҙе эшкәртеү **2.** камиллаштырыу, яҡшыртыу; **разрабо́тать го́лос** тауышты яҡшыртыу **3.** тикшереү, әҙерләү, ентекләп эшләү; **разрабо́тать вопро́с** һорауҙы ентекләп әҙерләү **4.** *горн.* сығарып (эшкәртеп) алып бөтөрөү; **рудни́к по́лностью разрабо́тан** рудник тулыһынса эшкәртеп бөтөрөлгән

**РАЗРАБО́ТАТЬСЯ** *сов.* эшкәртелеү, әҙерләнеү

**РАЗРАБО́ТКА** *ж* **1.** *см.* **разрабо́тать** – **разраба́тывать**; **разрабо́тка ле́са** урман әҙерләү; **разрабо́тка земли́** ер эшкәртеү **2.** *обычно мн.* **разрабо́тки** (*соображения, расчёты*) эштәр, иҫәпләүҙәр, асыштар **3.** сығарыу, табыу, сығарыу (эшкәртеү) юлы (ысулы); **разрабо́тка то́рфа** торф сығарыу; **откры́тая разрабо́тка** асыҡ юл менән сығарыу ысулы **4.** *мн.* **разрабо́тки** (*место добычи полезных ископаемых*) сығарған урын; **торфяны́е разрабо́тки** торф сығарған урын

**РАЗРА́ВНИВАТЬ** *несов. см.* **разровня́ть**

**РАЗРА́ВНИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **разра́внивать**

**РАЗРАЖА́ТЬСЯ** *несов. см.* **разрази́ться**

**РАЗРАЗИ́ТЬ: разрази́ гром** йәшен атһын; **пусть разрази́т бог** хоҙай һуҡһын

**РАЗРАЗИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*проявиться сразу с большой силой — о грозе, буре и т.п.*) ҡубыу, сығыу, башланыу; **бу́ря разрази́лась** дауыл ҡупты **2.** (*внезапно произойти — о горе, беде и т.п.*) килеп сығыу, башҡа төшөү; **разрази́лась беда́** бәлә килеп сыҡты **3.** *чем*; *перен.* башлау; **разрази́ться сме́хом** һын ҡатып көлә башлау; **разрази́ться прокля́тиями** ҡарғай башлау

**РАЗРАСТА́НИЕ** *с см.* **разраста́ться**; **разраста́ние со́рных трав** ҡый үләндәренең баҫып үҫеп китеүе

**РАЗРАСТА́ТЬСЯ** *несов. см.* **разрасти́сь**

**РАЗРАСТИ́СЬ** *сов.* **1.** үҫеп китеү, үргенләү, япрайыу; **кусты́ разросли́сь** ҡыуаҡтар үргенләгән **2.** үҫеп (ҙурайып) китеү, ишәйеү, күбәйеү; **го́род разро́сся** ҡала үҫеп киткән; **семе́йство разросло́сь** ғаилә ишәйгән

**РАЗРАЩЕ́НИЕ** *с* артыҡ үҫеш; **разраще́ние поли́пов** шештәрҙең артыҡ үҫеше

**РАЗРЕВЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** һыҙғыра (геүләй) башлау; **гудо́к разреве́лся** гудок геүләй башланы **2.** үкереп илай башлау; **ребёнок разреве́лся** бала үкереп илай башланы

**РАЗРЕДИ́ТЬ** *сов. что* **1.** һирәкләү, һирәгәйтеү, аралау; **разреди́ть кусты́** ҡыуаҡтарҙы һирәгәйтеү **2.** шыйыҡлау, һирәкләү, шыйығайтыу; **разреди́ть во́здух** һауаны шыйығайтыу

**РАЗРЕДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һирәгәйеү, һирәкләнеү, араланыу **2.** (*стать менее насыщенным*) шыйыҡланыу, шыйығайыу, һирәкләнеү; **тума́н разреди́лся** томан шыйығайҙы

**РАЗРЕЖА́ТЬ** *несов. см.* **разреди́ть**

**РАЗРЕЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разреди́ться** **2.** *страд. от* **разрежа́ть**

**РАЗРЕЖЁННОСТЬ** *ж* һирәклек, шыйыҡлыҡ; **разрежённость га́за** газдың шыйыҡлығы

**РАЗРЕЖЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разреди́ть** **2.** *прил.* һирәк, һирәкләнгән; **разрежённые всхо́ды** һирәк шытым **3.** *прил.* шыйығайтылған, көпшәк; **разрежённый во́здух** шыйығайтылған һауа

**РАЗРЕ́З** *м* **1.** *см.* **разре́зать** — **разреза́ть**; **разре́з шку́рок** тиреләрҙе ҡырҡҡылау **2.** йырыҡ, уйым; **разре́з пла́тья** күлдәктең йырығы **3.** (*сечение*) киҫелеш, киҫем; **вертика́льный разре́з возвы́шенности** ҡалҡыулыҡтың вертикаль киҫелеше; **продо́льный разре́з** буй киҫелеш **4.** *горн.* разрез (*файҙалы ҡаҙылмаларҙы сығара торған урын*) ♦ **в разре́зе** *чего* күҙлегенән сығып, сығып, яҡтан ҡарағанда, ҡараштан сығып; **разре́з глаз** күҙ уйымы

**РАЗРЕЗА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* ҡырҡа торған, ҡырҡҡыс; **разреза́льный нож** ҡырҡҡыс бысаҡ

**РАЗРЕ́ЗАТЬ** *сов. что* **1.** турау, киҫеү, ҡырҡыу, телеү, тураҡлау, киҫкеләү, телгеләү; **разре́зать хлеб** икмәк телеү; **разре́зать но́жницами** ҡайсы менән ҡырҡҡылау **2.** (һыуҙы) ярыу, ярып барыу (*суднолар тураһында*) **3.** *мед.* ярыу, ярып ебәреү, ҡырҡыу; **разре́зать нары́в** шеште ярыу **4.** *прост.* ҡырҡыу, ҡырҡып ебәреү; **разре́зать па́льчик** бармаҡты ҡырҡып ебәреү **5.** икегә айырыу (бүлеү), уртаға бүлеү; **река́ разре́зала го́род** йылға ҡаланы икегә бүлгән

**РАЗРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **разре́зать**

**РАЗРЕ́ЗАТЬСЯ** *сов.* туралыу, киҫелеү, ҡырҡылыу, теленеү, тураҡланыу, киҫкеләнеү, телгеләнеү

**РАЗРЕЗА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разре́заться** **2.** *страд. от* **разреза́ть**

**РАЗРЕЗНО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡырҡыу (ярыу) ...ы, ҡырҡа (яра) торған, ҡырҡҡыс; **разрезно́й стано́к** ҡырҡыу станогы **2.** йырыҡлы, йырылған, уйымлы, уйылған; **разрезна́я ю́бка** йырыҡлы итәк

**РАЗРЕ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **разре́зать**

**РАЗРЕ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разре́заться** **2.** *страд. от* **разре́зывать**

**РАЗРЕКЛАМИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* бик ныҡ (киң) рекламалау, артыҡ маҡтау; **разрекламировать това́р** тауарҙы бик киң рекламалау

**РАЗРЕША́ТЬ** *несов. см.* **разреши́ть**

**РАЗРЕША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разреши́ться** **2.** *безл.* рөхсәт ителә; **кури́ть не разреша́ется** тартырға рөхсәт ителмәй **3.** *страд. от* **разреша́ть**

**РАЗРЕШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **разреши́ть** 1, 2 — **разреша́ть**, **разреши́ться** 1 — **разреша́ться**; **разреше́ние противоре́чий** ҡаршылыҡтарҙы хәл итеү **2.** рөхсәт; **дава́ть разреше́ние** рөхсәт биреү; **получи́ть разреше́ние** рөхсәт алыу **3.** (*документ*) рөхсәтнамә, рөхсәт ҡағыҙы; **разреше́ние на строи́тельство** төҙөлөшкә рөхсәт ҡағыҙы **4.** (*результат*) һығымта, нәтижә **5.** (*решение, воплощение*) тормошҡа ашырыу, хәл ителеш, сағылыш ♦ **с ва́шего разреше́ния** рөхсәт итһәгеҙ, һеҙҙең рөхсәтегеҙ менән, һеҙ ҡаршы килмәһәгеҙ

**РАЗРЕШИ́МЫЙ,** -ая, -ое хәл итерлек, сисә алырлыҡ; **разреши́мый вопро́с** хәл итерлек мәсьәлә

**РАЗРЕШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* рөхсәт ...ы, рөхсәт итеү ...ы; **разреши́тельные докуме́нты** рөхсәт документтары

**РАЗРЕШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** рөхсәт итеү (биреү); **разреши́ть вы́езд из го́рода** ҡаланан сығырға рөхсәт итеү; **разреши́ть гуля́ть** йөрөргә рөхсәт итеү; **разреши́ть кни́гу к печа́ти** китап баҫтырырға рөхсәт биреү **2.** хәл итеү, сисеү, асыҡлау, тикшереп сисеү; **разреши́ть нау́чный вопро́с** фәнни мәсьәләне хәл итеү; **разреши́ть пробле́му** проблеманы хәл итеү **3.** *повел. с неопр.* **разреши́(те)** рөхсәт ит(егеҙ), рөхсәтме ♦ **разреши́ть сомне́ния** шик-шөбһәләрҙе юҡҡа сығарыу, асыҡлыҡ индереү

**РАЗРЕШИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** хәл ителеү, сиселеү, асыҡланыу; **вопро́с разреши́лся** мәсьәлә асыҡланды; **зага́дка разреши́лась** йомаҡ сиселде **2.** хәл ителеү, бөтөү, тамамланыу, теүәлләнеү; **де́ло разреши́лось** эш тамамланды; **схва́тка разреши́лась** алыш бөттө **3.** *кем* и *без доп.*; *уст.* тыуҙырыу, ҡотолоу, бала табыу; **разреши́ться дво́йней** игеҙәк бала табыу; **благополу́чно разреши́ться** имен-аман тыуҙырыу

**РАЗРИСОВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** биҙәү, биҙәкләү, һырлау, һүрәт төшөрөп (биҙәкләп) бөтөрөү; **разрисова́ть сте́ны** стеналарға һүрәт төшөрөп бөтөү; **разрисова́ть цвета́ми** сәскәләр менән биҙәкләү **2.** *перен.*, *разг.* һөйләп биреү, арттырып һөйләү, тасуирлау (*насар йәки яҡшы яҡтарҙы*); **разрисова́ть встре́чу** осрашыу тураһында һөйләп биреү

**РАЗРИСОВА́ТЬСЯ** *сов.* биҙәлеү, һырланыу, һүрәт (биҙәк) менән ҡапланыу; **стёкла разрисова́лись сне́жными узо́рами** быяла ҡар биҙәктәре менән ҡапланды

**РАЗРИСО́ВКА** *ж см.* **разрисова́ть** — **разрисо́вывать**; **разрисо́вка стен** стеналар биҙәкләү

**РАЗРИСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **разрисова́ть**

**РАЗРОВНЯ́ТЬ** *сов. что* тигеҙләү, тигеҙләп сығыу; **разровня́ть зе́млю** ерҙе тигеҙләп сығыу

**РАЗРОДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (баланан) ҡотолоу, бушаныу

**РАЗРО́ЗНЕННОСТЬ** *ж* тарҡаулыҡ; **разро́зненность рабо́чих** эшселәрҙең тарҡаулығы

**РАЗРО́ЗНЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разро́знить 2.** *прил.* кәм, ишһеҙ, тулы булмаған; **разро́зненное бельё** ишһеҙ эс кейеме **3.** *прил.* айырым (*төрлө киҫәктәрҙән торған*); **разро́зненные тома́ собра́ния сочине́ний** әҫәрҙәрҙең айырым томдары **4.** *прил.* тарҡау, тарау, берҙәм булмаған, айырым-айырым; **разро́зненная гру́ппа** тарҡау төркөм; **разро́зненные отря́ды** айырым-айырым отрядтар

**РАЗРО́ЗНИТЬ** *сов. что* (ишенән) айырыу, ишһеҙләндереү; **разро́знить компле́кт журна́лов** журналдарҙы комплекттан айырыу

**РАЗРО́ЗНИТЬСЯ** *сов.* ишһеҙләнеү, комплекты боҙолоу, айырылыу; **серви́з разро́знился** сервиз ишһеҙләнде

**РАЗРУ́Б** *м см.* **разруби́ть** — **разруба́ть**; **разру́б мя́са** ит сабыу

**РАЗРУБА́ТЬ** *несов. см.* **разруби́ть**

**РАЗРУБИ́ТЬ** *сов. что* сабыу, сапҡылап ваҡлау, тураҡлау, ҡырҡыу, киҫеү; **разруби́ть поле́но** утын ағасын ҡырҡыу; **разруби́ть ту́шу** түшкәне сабыу

**РАЗРУГА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** әрләү, тиргәү, һүгеү, битәрләү; **разруга́ть за опозда́ние** һуңлаған өсөн тиргәү **2.** ныҡ тәнҡитләү, тиргәп ташлау; **разруга́ть но́вую кни́гу** яңы китапты ныҡ тәнҡитләү

**РАЗРУГА́ТЬСЯ** *сов. с кем*; *разг.* ҡысҡырышып әрләшеү, ирешеп (әрләшеп) китеү; **разруга́ться с наёмными рабо́чими** ялланған эшселәр менән ҡысҡырышып әрләшеү

**РАЗРУМЯ́НИВАТЬ** *несов. см.* **разрумя́нить**

**РАЗРУМЯ́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разрумя́ниться 2.** *страд. от* **разрумя́нивать**

**РАЗРУМЯ́НИТЬ** *сов. кого-что* ҡыҙартыу, алһыуландырыу, һандал һөртөү; **разрумя́нить щёки** бит остарын ҡыҙартыу

**РАЗРУМЯ́НИТЬСЯ** *сов.* алһыуланыу, ҡыҙарыу, һандал һөртөнөү; **лицо́ разрумя́нилось** йөҙө алһыуланды

**РАЗРУ́ХА** *ж* емереклек, бөлгөнлөк; **экономи́ческая разру́ха** иҡтисади бөлгөнлөк; **вы́йти из разру́хи** емереклектән сығыу

**РАЗРУША́ТЬ** *несов. см.* **разру́шить**

**РАЗРУША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разру́шиться 2.** *страд. от* **разруша́ть**

**РАЗРУШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **разру́шить** — **разруша́ть**, **разру́шиться** — **разруша́ться**; **разруше́ние кре́пости** ҡәлғәнең емерелеүе; **разруше́ние за́мыслов врага́** дошмандың ниәтен юҡҡа сығарыу; **разруше́ние органи́зма** организмдың тарҡалыуы **2.** емереклек, хараба, ҡыйралыш; **большо́е разруше́ние** ҙур ҡыйралыш; **разруше́ния от землетрясе́ния** ер тетрәү емереклектәре

**РАЗРУШИ́ТЕЛЬ** *м* емереүсе, ҡаҡшатыусы, юҡҡа сығарыусы, тарҡатыусы; **разруши́тели здоро́вья** сәләмәтлекте ҡаҡшатыусылар

**РАЗРУШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое емергес, һәләкәтле, афәтле; **разруши́тельная си́ла** емергес көс; **разруши́тельный урага́н** һәләкәтле дауыл

**РАЗРУ́ШИТЬ** *сов. что* **1.** емереү, ҡыйратыу, ватыу; **разру́шить постро́йку** ҡоролманы ҡыйратыу **2.** *перен.* емереү, тарҡатыу; **разру́шить хозя́йство** хужалыҡты тарҡатыу **3.** *перен.* бөтөрөү, ҡаҡшатыу; **разру́шить здоро́вье** һаулыҡты бөтөрөү **4.** *перен.* боҙоу, юҡҡа сығарыу; **разру́шить пла́ны** пландарҙы юҡҡа сығарыу

**РАЗРУ́ШИТЬСЯ** *сов.* **1.** емерелеү, ҡыйрау, ҡыйралыу; **го́род разру́шился** ҡала ҡыйралды **2.** *перен.* тарҡалыу; **семья́ разру́шилась** ғаилә тарҡалды **3.** *перен.* бөтөү, ҡаҡшау; **здоро́вье разру́шилось** һаулыҡ ҡаҡшаны **4.** *перен.* боҙолоу, юҡҡа сығыу; **наде́жды разру́шились** өмөттәр юҡҡа сыҡты

**РАЗРЫ́В** *м* **1.** *см.* **разорва́ть** 1, 2, 3 — **разрыва́ть** I, **разорва́ться** 1, 2, 4 — **разрыва́ться** I; **разры́в дипломати́ческих отноше́ний** дипломатик мөнәсәбәттәрҙе өҙөү; **разры́в пря́жи** ептең өҙөлөүе; **разры́в грана́ты** граната шартлауы **2.** өҙөк, өҙөлөү, өҙөлгән урын; **найти́ разры́в про́вода** сымдың өҙөлгән урынын табыу; **разры́в ли́нии фро́нта** фронт һыҙығының өҙөлөү араһы **3.** *перен.* айырма, тура килмәгәнлек; **разры́в**

**ме́жду спро́сом и предложе́нием** талап менән тәҡдим айырмаһы

**РАЗРЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **разорва́ть**

**РАЗРЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **разры́ть**

**РАЗРЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **разорва́ться 2.** *страд. от* **разрыва́ть** I ♦ **душа́ (се́рдце) разрыва́ется** йөрәк өҙгөләнә (телгеләнә); **разрыва́ться на ча́сти** ҡырҡҡа ярылырҙай булыу

**РАЗРЫВА́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **разрыва́ть** II

**РАЗРЫВНО́Й,** -ая, -ое шартлағыс; **разрывно́й заря́д** шартлағыс заряд; **разрывна́я пу́ля** шартлағыс пуля

**РАЗРЫДА́ТЬСЯ** *сов.* үкһеп (үкереп) илап ебәреү, аҡырып (ҡысҡырып) илай башлау; **разрыда́ться от бо́ли** ауыртыуҙан үкһеп илап ебәреү

**РАЗРЫ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡаҙыу, ҡаҙып ташлау (бөтөрөү); **разры́ть зе́млю** ерҙе ҡаҙып ташлау; **разры́ть я́му** соҡор ҡаҙыу **2.** *разг.* аҡтарыу, аҡтарып (туҙҙырып) ташлау; **разры́ть все бума́ги** бөтә ҡағыҙҙарҙы аҡтарып ташлау

**РАЗРЫХЛЕ́НИЕ** *с см.* **разрыхли́ть** — **разрыхля́ть**, **разрыхли́ться** — **разрыхля́ться**; **разрыхле́ние по́чвы** тупраҡты йомшартыу

**РАЗРЫХЛЁННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **разрыхли́ть**

**РАЗРЫХЛЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** көпшәкләнеү, йомшарыу, кәүшәк булыу; **снег разрыхле́л** ҡар көпшәкләнде **2.** (*о человеке*) былҡыланыу, былҡы булыу, йомшаҡ (бушаҡ) тәнлегә әйләнеү, кәүшәкләнеү

**РАЗРЫХЛИ́ТЕЛЬ** *м* йомшартҡыс; **разрыхли́тель по́чвы** тупраҡ йомшартҡыс

**РАЗРЫХЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йомшартҡыс, йомшарта торған; **разрыхли́тельный агрега́т** йомшарта торған яйланма

**РАЗРЫХЛИ́ТЬ** *сов. что* йомшартыу, көпшәкләндереү, кәүшәк итеү; **разрыхли́ть зе́млю** ерҙе йомшартыу; **разрыхли́ть снег** ҡарҙы көпшәкләндереү

**РАЗРЫХЛИ́ТЬСЯ** *сов.* көпшәкләнеү, йомшарыу, кәүшәкләнеү, йомшарып (йөнтәҫләнеп, өбөрөһө сығып) күпереү; **волокно́ разрыхли́лось** сүс йомшарып күпергән

**РАЗРЫХЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **разрыхли́ть**

**РАЗРЫХЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разрыхли́ться 2.** *страд. от* **разрыхля́ть**

**РАЗРЯ́Д I** *м* **1.** төркөм, ҡатлам, төр, рәт; **зачи́слить в разря́д передовико́в** алдынғылар төркөмөнә индереү **2.** (*степень квалификации*) разряд; **вы́сший разря́д** юғары разряд; **но́рма разря́да** разряд нормаһы **3.** *мат.* разряд; **разря́д чи́сел** һандар разряды; **ци́фра пе́рвого разря́да** беренсе разряд һаны

**РАЗРЯ́Д II** *м см.* **разряди́ть** II — **разряжа́ть** II, **разряди́ться** II 1, 2 — **разряжа́ться** II; **разря́д ружья́** мылтыҡтың зарядһыҙланыуы; **разря́д батаре́и** батареяның заряды бөтөү

**РАЗРЯДИ́ТЬ I** *сов. кого-что*; *разг.* өҫтө-башын матурлау, ҡупшы итеп кейендереү, яһандырыу

**РАЗРЯДИ́ТЬ II** *сов. что* **1.** яһағын алыу; **разряди́ть ружьё** мылтыҡтың яһағын алыу **2.** *физ.* зарядһыҙлау, зарядын бөтөрөү, бушатыу; **разряди́ть аккумуля́тор** аккумуляторҙы зарядһыҙлау **3.** *перен.* йомшартыу, кәметеү, бөтөрөү; **разряди́ть междунаро́дную обстано́вку** халыҡ-ара хәлде йомшартыу

**РАЗРЯДИ́ТЬСЯ I** *сов*; *разг.* бик ҡупшы кейенеү, кейенеү-яһаныу

**РАЗРЯДИ́ТЬСЯ II** *сов.* **1.** яһағы алыныу **2.** *физ.* зарядһыҙланыу; **конденса́тор разряди́лся** конденсатор зарядһыҙланды **3.** *перен.* йомшарыу, юҡҡа сығыу, бөтөү; **обстано́вка разряди́лась** хәл йомшарҙы

**РАЗРЯ́ДКА** *ж* **1.** *разг. см.* **разряди́ть** II — **разряжа́ть** II, **разряди́ться** II — **разряжа́ться**; **разря́дка ружья́** мылтыҡтың яһағын алыу; **разря́дка аккумуля́тора** аккумуляторҙың зарядһыҙланыуы; **разря́дка не́рвной напряжённости** нервы көсөргәнешлегенең кәмеүе **2.** *полигр.* разрядка, хәрефтәрҙе һирәкләү (һирәк итеү); **вы́делить разря́дкой** хәрефтәрҙе һирәк итеп айырыу

**РАЗРЯ́ДНИК I** *м*; *физ.* зарядһыҙландырғыс; **искрово́й разря́дник** осҡонло зарядһыҙландырғыс

**РАЗРЯ́ДНИК II** *м*; *разг.* (*спортсмен*) разрядсы; **увеличе́ние числа́ разря́дников** разрядсылар һаны артыу

**РАЗРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** разряд ...ы; **разря́дные но́рмы** разряд нормалары **2.** *спорт.* разрядсы(лар) ...ы; **разря́дные гру́ппы** разрядсылар төркөмө

**РАЗРЯЖА́ТЬ I** *несов. см.* **разряди́ть** I

**РАЗРЯЖА́ТЬ II** *несов. см.* **разряди́ть** II

**РАЗРЯЖА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **разряди́ться** I; **2.** *страд. от* **разряжа́ть** I

**РАЗРЯЖА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **разряди́ться** II; **2.** *страд. от* **разряжа́ть** II

**РАЗРЯ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разряди́ть** I; **2.** *прил.* ҡупшы кейенгән, кейенеп-яһанған; **разря́женные де́вушки** кейенеп-яһанған ҡыҙҙар

**РАЗУБЕДИ́ТЬ** *сов. кого-что, в чём* дүндереү, ҡайтауыллатыу; **разубеди́ть его́ тру́дно** уны дүндереү ауыр

**РАЗУБЕДИ́ТЬСЯ** *сов. в чём* дүнеү, ҡайтауыллау, ҡайтыу; **разубеди́ться в свои́х вы́водах** һығымталарыңдан дүнеү

**РАЗУБЕЖДА́ТЬ** *несов. см.* **разубеди́ть**

**РАЗУБЕЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разубеди́ться 2.** *страд. от* **разубежда́ть**

**РАЗУВА́ТЬ** *несов. см.* **разу́ть**

**РАЗУВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разу́ться 2.** *страд. от* **разува́ть**

**РАЗУВЕ́РИТЬ** *сов. кого-что* уйынан дүндереү, ҡайтауыллатыу, ышанысын юғалтыу (бөтөрөү)

**РАЗУВЕ́РИТЬСЯ** *сов. в ком-чём* уйҙан (фекерҙән) дүнеү, ышаныс юғалтыу (бөтөү)

**РАЗУВЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **разуве́рить**

**РАЗУВЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разуве́риться** **2.** *страд. от* **разуверя́ть**

**РАЗУДА́ЛЫЙ,** -ая, -ое *трад.-поэт.* бик булдыҡлы, ҡыйыу, етеҙ, үткер, сос; **разуда́лый мо́лодец** бик булдыҡлы егет

**РАЗУЗНАВА́ТЬ** *несов. см.* **разузна́ть**

**РАЗУЗНА́ТЬ** *сов. что, о ком-чём*; *разг.* һорашып (тикшереп, төпсөнөп, соҡсоноп) белешеү (белеү), мәғлүмәт алыу; **разузна́ть о новостя́х** яңылыҡтар тураһында һорашып белеү

**РАЗУКРА́СИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* биҙәү, биҙәкләү, сыбарлап (биҙәп) бөтөрөү; **моро́з разукра́сил стёкла** һыуыҡ тәҙрәләрҙе биҙәкләгән; **разукра́сить дом** өйҙө биҙәү

**РАЗУКРА́СИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* биҙәлеү, матурланыу, сыбарланып (биҙәлеп) бөтөү

**РАЗУКРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **разукра́сить**

**РАЗУКРА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разукра́ситься** **2.** *страд. от* **разукра́шивать**

**РАЗУКРУПНЕ́НИЕ** *с см.* **разукрупни́ть** — **разукрупня́ть**, **разукрупни́ться** — **разукрупня́ться**; **разукрупне́ние совхо́зов** совхоздарҙы бүлеү

**РАЗУКРУПНИ́ТЬ** *сов. что* ваҡландырыу, бүлгеләү, бүлеү; **разукрупни́ть о́бласть** өлкәне бүлгеләү; **разукрупни́ть трест** тресты бүлеү

**РАЗУКРУПНИ́ТЬСЯ** *сов.* ваҡланыу, вағайыу, бүленеү; **брига́ды разукрупни́лись** бригадалар бүленде

**РАЗУКРУПНЯ́ТЬ** *несов. см.* **разукрупни́ть**

**РАЗУКРУПНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разукрупни́ться** **2.** *страд. от* **разукрупня́ть**

**РА́ЗУМ** *м* аҡыл, аң, зиһен ♦ **ум за ра́зум зашёл (захо́дит)** *у кого* башы эшләмәү, зиһене таралыу **учи́ть уму́-ра́зуму** *см.* **ум**

**РАЗУМЕ́НИЕ** *с*; *уст.* **1.** (*понимание*) төшөнөү, аңлау; **досту́пное разуме́ние** аңлау мөмкин **2.** *разг.* (*мнение*) аңлау (төшөнөү) ҡеүәһе; **по разуме́нию** аңлауынса, уйынса

**РАЗУМЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *что*; *уст.* аңлау, төшөнөү, фәһемләү, асылына төшөнөү; **разуме́ть де́ло** эштең асылына төшөнөү **2.** (*подразумевать*) күҙ уңында тотоу, әйтергә теләү, әйтеп ҡалдырыу

**РАЗУМЕ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*подразумеваться*) аңлашылыу, күҙ уңында тотолоу; **само́ собо́й разуме́ется** үҙенән-үҙе аңлашыла **2.** *в 3 л. ед. ч. наст. вр.* **разуме́ется** *в знач. вводн. сл.* әлбиттә, билдәле, аңлашыла

**РАЗУ́МНИК** *м* и **РАЗУ́МНИЦА** *ж*; *разг.* аҡыллы, зирәк (*күберәк балаларға ҡарата*)

**РАЗУ́МНОСТЬ** *ж* аҡыллылыҡ, фәһемлелек; **разу́мность реше́ния** ҡарарҙың аҡыллылығы

**РАЗУ́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*обладающий разумом*) аҡыллы; **разу́мное существо́** аҡыллы зат **2.** (*основанный на разуме*) төплө, аҡыллы, фәһемле; **разу́мный посту́пок** аҡыллы эш; **разу́мные до́воды** аҡыллы дәлилдәр

**РАЗУТЕ́ШИТЬ** *сов. кого* йыуатыу, ҡыуандырыу, күңелен асыу (күтәреү); **разуте́шить старика́** ҡартты йыуатыу

**РАЗУ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разу́ть** **2.** *прил.* ялан аяҡ; **разу́тый ма́льчик** ялан аяҡ малай

**РАЗУ́ТЬ** *сов. кого-что* аяҡ кейемен һалдырыу (систереү); **разу́ть ребёнка** баланың аяҡ кейемен һалдырыу

**РАЗУ́ТЬСЯ** *сов.* аяҡ кейемен һалыу (сисеү)

**РАЗУТЮ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **разутю́жить**

**РАЗУТЮ́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разутю́житься** **2.** *страд. от* **разутю́живать**

**РАЗУТЮ́ЖИТЬ** *сов. что* яҡшы итеп үтекләү, үтекләп ҡуйыу; **разутю́жить брю́ки** яҡшы итеп салбар үтекләү

**РАЗУТЮ́ЖИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* үтекләнеү, үтекләнеп бөтөү

**РАЗУХА́БИСТЫЙ,** -ая, -ое *прост.* **1.** (*удалой, бойкий*) ҡыйыу, етеҙ, булдыҡлы **2.** (*слишком вольный*) тыйнаҡһыҙ, әҙәпһеҙ, тәртипһеҙ; **разуха́бистые мане́ры** тыйнаҡһыҙ ҡылыҡтар

**РАЗУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **разучи́ть**

**РАЗУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разучи́ться** **2.** *страд. от* **разу́чивать**

**РАЗУЧИ́ТЬ** *сов. что* ятлау, өйрәнеү, отоу, отоп алыу; **разучи́ть ка́ждое движе́ние** һәр хәрәкәтте өйрәнеү; **разучи́ть но́вую пе́сню** яңы йыр өйрәнеү

**РАЗУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* онотоу, онотоп бөтөү; **разучи́ться игра́ть на роя́ле** роялдә уйнауҙы онотоу

**РАЗЪ...** *приставка см.* **раз...**

**РАЗЪЕДА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **разъе́сть** **2.** *перен.* (*губительно действовать на что-л.*) ашау, бөтөрөү; **зло́ба разъеда́ла его́ се́рдце** асыу уның йөрәген бөтөрҙө

**РАЗЪЕДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разъе́сться** **2.** *страд. от* **разъеда́ть**

**РАЗЪЕДИНЕ́НИЕ** *с см.* **разъедини́ть** — **разъединя́ть**, **разъедини́ться** — **разъединя́ться**; **разъедине́ние о́бщества** йәмғиәттең тарҡалыуы; **разъедине́ние проводо́в** сымдарҙы өҙөү; **разъедине́ние с сы́ном** улы менән бәйләнеш өҙөлөү

**РАЗЪЕДИНИ́ТЕЛЬ** *м*; *эл.* өҙгөс, айырғыс

**РАЗЪЕДИНИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** өҙөү; **разъедини́ть провода́** сымдарҙы өҙөү **2.** (*разлучить*) айырыу, аралау; **судьба́ их разъедини́ла** яҙмыш уларҙы айырҙы

**РАЗЪЕДИНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** өҙөлөү; **провода́ разъедини́лись** үткәргестәр өҙөлдө **2.** (*разобщиться*) *перен.* айырылыу, араланыу, бәйләнеш өҙөлөү, тарҡалыу; **друзья́ разъедини́лись** дуҫтарҙың бәйләнеше өҙөлдө

**РАЗЪЕДИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **разъедини́ть**

**РАЗЪЕДИНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разъедини́ться 2.** *страд. от* **разъединя́ть**

**РАЗЪЕ́ЗД** *м* **1.** *см.* **разъезжа́ть, разъезжа́ться** 1, 3, 4; **разъе́зд делега́тов** делегаттарҙың таралышыуы; **быть в разъе́зде** юлда булыу **2.** *мн.* **разъе́зды** (*поездки*) сәфәр, юлда йөрөү; **разъе́зды по хозя́йствам** хужалыҡтар буйлап йөрөү **3.** *воен.* разъезд, атлылар төркөмө (*күҙәтселәр, һаҡсылар*) **4.** *ж.-д.* разъезд (*бәләкәй генә станция*)

**РАЗЪЕ́ЗДИТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (күп йөрөп) һалыу (таҡырлау); **разъе́здить доро́гу** юлды таҡырлау **2.** (күп йөрөп) боҙоу (боҙоп бөтөрөү)

**РАЗЪЕ́ЗДИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күп (йыш) йөрөй башлау; **верховы́е разъе́здились** һыбайлылар күп йөрөй башланы

**РАЗЪЕЗДНО́Й,** -ая, -ое **1.** йөрөүсе, күсмә; **разъездно́й аге́нт** йөрөүсе агент; **разъездна́я гру́ппа теа́тра** театрҙың күсмә төркөмө **2.** *в знач. сущ.* **разъездно́й** *м* йөргәнсө, йөрөксө; **его́ назна́чили разъездны́м** уны йөрөксө итеп тәғәйенләнеләр **3.** юл, юлға бирелгән, юл ...ы; **разъездны́е расхо́ды** юл сығымдары **4.** *ж.-д.* разъезд ...ы, айырылышыу ...ы; **разъездно́й путь** разъезд юлы

**РАЗЪЕЗЖА́ТЬ** *несов.* йөрөү, юл йөрөү; **разъезжа́ть по дела́м слу́жбы** эш менән йөрөү; **разъезжа́ть по стране́** ил буйлап йөрөү

**РАЗЪЕЗЖА́ТЬСЯ** *несов. см.* **разъе́хаться**

**РАЗЪЕ́ЗЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разъе́здить 2.** *прил.* боҙолған, боҙоҡ; **разъе́зженная доро́га** боҙоҡ юл

**РАЗЪЕ́ЗЖИВАТЬ** *несов. см.* **разъе́здить**

**РАЗЪЕ́ЗЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разъе́здиться 2.** *страд. от* **разъе́зживать**

**РАЗЪЁМ** *м*; *спец. см.* **разня́ть — разнима́ть** 1; **разъём дета́лей** деталь айырыһы

**РАЗЪЁМНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* алынмалы; **разъёмная констру́кция** алынмалы конструкция

**РАЗЪЕ́СТЬ** *сов. что* ашау, киҫеү, яндырыу, ашап (киҫеп) бөтөү; **ржа́вчина разъе́ла желе́зо** тимерҙе тут ашаған

**РАЗЪЕ́СТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һимереү, ашап йыуанайыу

**РАЗЪЕ́ХАТЬСЯ** *сов.* **1.** таралыу, таралышыу, таралып китеп бөтөү; **разъе́хаться в ра́зные сто́роны** төрлө яҡҡа таралыу; **го́сти разъе́хались** ҡунаҡтар таралышты **2.** *с кем* и *без доп.*; *разг.* айырылышыу, ташлашыу; **разъе́хаться с му́жем** ир менән айырылышыу **3.** (*разминуться*) аймылышыу, аймылыш булыу; **разъе́хаться с подру́гой** әхирәт менән аймылышыу **4.** юл биреү (бирешеү); **маши́нам тру́дно разъе́хаться на у́зкой доро́ге** тар юлда машиналарға юл бирешеүе ауыр **5.** *разг.* (*развалиться*) таралып төшөү, өҙөлөү, тетелеү, бүҫелеп сығыу, ылҡаһы ҡалмау; **ста́рые сала́зки разъе́хались** иҫке сана таралып төштө **6.** *разг.* (*при скольжении*) (тайып) айырылыу (айырылып китеү); **лы́жи разъе́хались на льду** боҙҙа саңғылар тайып айырылды **7.** *прост.* (*находясь где-л., занять много места*) йәйрәү, йәйелеү, йәйрәп (йәйелеп) ултырыу

**РАЗЪЯРЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **разъяри́ть 2.** *прил.* ярһыған, ҡоторонған, шашҡан, асыуы ҡабарған; **разъярённый зверь** шашҡан йыртҡыс

**РАЗЪЯРИ́ТЬ** *сов. кого-что* асыуын ҡабартыу, ярһытыу, шаштырыу; **разъяри́ть соба́ку** этте ярһытыу

**РАЗЪЯРИ́ТЬСЯ** *сов.* асыу ҡабарыу, ярһыу, шашыу; **лев разъяри́лся** арыҫландың асыуы ҡабарҙы

**РАЗЪЯРЯ́ТЬ** *несов. см.* **разъяри́ть**

**РАЗЪЯРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разъяри́ться 2.** *страд. от* **разъяря́ть**

**РАЗЪЯСНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **разъясни́ть — разъясня́ть, разъясни́ться — разъясня́ться; разъясне́ние вопро́сов** мәсьәләне төшөндөрөү; **разъясне́ние де́ла** эште аңлатыу **2.** (*объяснение*) аңлатма, асыҡлама; **дава́ть разъясне́ния** аңлатма биреү

**РАЗЪЯ́СНЕТЬ** *сов. безл.*; *прост.* (*о погоде*) аяҙыу, аяҙытыу, көн асылыу; **к полу́дню разъя́снело** төшкә аяҙытты

**РАЗЪЯ́СНИВАТЬСЯ** *несов. см.* **разъя́сниться**

**РАЗЪЯСНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аңлатыу ...ы, төшөндөрөү ...ы; **разъясни́тельная рабо́та** аңлатыу эше

**РАЗЪЯСНИ́ТЬ** *сов. что* аңлатыу, төшөндөрөү, аңлатып (төшөндөрөп) биреү, асыҡлау; **разъясни́ть зада́чу** мәсьәләне төшөндөрөү; **разъясни́ть пра́вило** ҡағиҙәне аңлатыу

**РАЗЪЯ́СНИТЬСЯ** *сов.*; *прост.* аяҙытыу, асылыу, асыҡланыу; **не́бо разъя́снилось** күк асылды

**РАЗЪЯСНИ́ТЬСЯ** *сов.* аңлашылыу, асыҡланыу, аныҡланыу; **де́ло разъясни́лось** эш асыҡланды

**РАЗЪЯСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **разъясни́ть**

**РАЗЪЯСНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разъясни́ться 2.** *страд. от* **разъясня́ть**

**РАЗЪЯ́ТЬ** *сов. см.* **разня́ть** 1

**РАЗЪЯ́ТЬСЯ** *сов. см.* **разня́ться**

**РАЗЫГРА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** уйнау, башҡарыу; **разыгра́ть спекта́кль** спектакль уйнау **2.** уйнап бөтөү, башҡарып сығыу, уйнап алыу (сығыу); **разыгра́ть па́ртию в ша́хматы** бер партия шахмат уйнап алыу **3.** һалыу, ҡуйыу, уйнау; **разыгра́ть в лотере́ю** лотерея уйнау; **разыгра́ть по жре́бию** йәрәбәгә һалыу **4.** (*изобразить кого-что-л.*) күрһәтеү, булып ҡыланыу, -ға/-гә һалышыу; **разыгра́ть простачка́** бер ҡатлы булып ҡыланыу **5.** *разг.* мәрәкәләү, шаяртыу, көлөү; **разыгра́ть дру́га** дуҫты шаяртыу ♦ **разыгра́ть дурака́** ахмаҡлыҡ эшләү

**РАЗЫГРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** уйынға бирелеү, уйын менән мауығыу, уйынға мауығып (бирелеп) китеү; **де́ти разыгра́лись** балалар уйынға мауығып китте **2.** *разг.* ҡыҙып (дәртләнеп) уйнай башлау; **пиани́ст разыгра́лся** пианист дәртләнеп уйнай башланы **3.** көсәйеп (шәбәйеп) китеү; **аппети́т разыгра́лся** аппетит көсәйеп китте; **бу́ря разыгра́лась** дауыл көсәйеп китте **4.** ҡубыу, башланыу, килеп сығыу; **разыгра́лся бой** һуғыш башланды; **разыгра́лся сканда́л** шау-шыу ҡупты

**РАЗЫ́ГРЫВАТЬ** *несов. см.* **разыгра́ть**

**РАЗЫ́ГРЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разыгра́ться** 2—4; **2.** *страд. от* **разы́грывать**

**РАЗЫСКА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **разыска́ть 2.** *обычно мн.* **разыска́ния** (*исследования, поиски*) эҙләнеү, тикшеренеү; **разыска́ния о башки́рских шежере́** башҡорт шәжәрәләре хаҡында тикшеренеү

**РАЗЫСКА́ТЬ** *сов. кого-что* эҙләп табыу; **разыска́ть пропа́вших бе́з вести** хәбәрһеҙ юғалғандарҙы эҙләп табыу

**РАЗЫСКА́ТЬСЯ** *сов.* (эҙләп) табылыу; **вещь разыска́лась** әйбер эҙләп табылды

**РАЗЫ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **разыска́ть**

**РАЗЫ́СКИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разыска́ться 2.** *страд. от* **разы́скивать**

**РАЙ** *м*; *прям., перен.* йәннәт, ожмах; **земно́й рай** ерҙәге ожмах

**РАЙ...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "район" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **райсове́т** райсовет (*район советы*)

**РАЙИСПОЛКО́М** *м* (*районный исполнительный комитет*) райисполком (*район башҡарма комитеты*)

**РАЙКО́М** *м* (*районный комитет*) райком (*район комитеты*)

**РАЙО́Н** *м* **1.** район; **Аргая́шский райо́н Челя́бинской о́бласти** Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы **2.** *разг.* (*административный центр района и находящееся в нём руководство*) район, район үҙәге; **зае́хать в райо́н** район үҙәгенә инеп сығыу **3.** район, өлкә, төбәк; **земледе́льческий райо́н** игенселек районы **4.** *в разн. знач.* район, урын, эргә, тирә; **райо́н затопле́ния** һыу баҫҡан урын; **в райо́не автовокза́ла** автовокзал тирәһендә; **рабо́чий райо́н** эшселәр районы

**РАЙОНИ́РОВАНИЕ** *с см.* **райони́ровать**

**РАЙОНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *спец.* **1.** районлдарға бүлеү; **райони́ровать о́бласть** өлкәне районлдарға бүлеү **2.** районлаштырыу; **райони́ровать сорта́ пшени́цы** бойҙайҙың сорттарын районлаштырыу

**РАЙОНИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **райони́ровать**

**РАЙО́ННЫЙ,** -ая, -ое район ...ы, райондағы; **райо́нный агроно́м** район агрономы; **райо́нный представи́тель** район вәкиле

**РА́ЙСКИЙ,** -ая, -ое **1.** ожмах ...ы, йәннәт ...ы, ожмахтағы, йәннәттәге; **ра́йская пти́ца** ожмах ҡошо **2.** *перен.* бик матур, һоҡландырғыс, бик яғымлы; **ра́йское ме́сто** бик матур урын **3.** *перен.* бәхетле, иркен, мул; **ра́йская жизнь** бәхетле тормош

**РАЙСОВЕ́Т** *м* (*районный совет*) райсовет (*район советы*)

**РАК I** *м* **1.** ҡыҫала; **речны́е ра́ки** йылға ҡыҫалалары **2.** *астр.* Ҡыҫала (*йондоҙлоҡ*) ♦ **когда́ рак сви́стнет** *прост.* ҡыҙыл ҡар яуғас, дөйә ҡойроғо ергә тейгәс; **показа́ть, где ра́ки зиму́ют** *прост.* күрмәгәнен күрһәтеү, атаһын-инәһен танытыу

**РАК II** *м* рак, яман шеш; **рак желу́дка** ашҡаҙандағы яман шеш

**РА́КЕЛЬ** *м*; *полигр.* ракель (*полиграфияла буяу ҡырыу өсөн ҡулланылған бысаҡ*)

**РАКЕ́ТА** *ж*; *в разн. знач.* ракета; **косми́ческая раке́та** космик ракета; **межконтинента́льная раке́та** континент-ара ракета; **метеорологи́ческая раке́та** метеорология ракетаһы; **многосту́пенчатая раке́та** күп быуынлы ракета; **сигна́льная раке́та** сигнал ракетаһы

**РАКЕ́ТКА** *ж*; *спорт.* ракетка, теннис (бадминтон) ҡалағы

**РАКЕ́ТНИЦА** *ж* ракетница (*сигнал ракеталарын атыу пистолеты*)

**РАКЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое ракета ...ы; **раке́тная те́хника** ракета техникаһы; **раке́тное ору́жие** ракета ҡоралы

**РАКЕТОДРО́М** *м* ракетодром (*ракеталар һынау, осороу ҡоролмаһы*)

**РАКЕ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спорт.* ракетка ...ы; **раке́тная се́тка** ракетка селкаһы

**РАКЕ́ТЧИК** *м* **1.** ракета сигналы биреүсе **2.** *в разн. знач.* ракетчик, ракетасы

**РАКЕ́ТЧИЦА** *ж* ракета сигналы биреүсе

**РАКИ́ТА** *ж* кәзә талы

**РАКИ́ТНИК** *м*; *бот.* **1.** кәзә таллығы, таллыҡ **2.** аҡселек

**РАКИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое кәзә талы ...ы; **раки́товый куст** кәзә талы ҡыуаҡлығы

**РА́КОВИНА** *ж* **1.** ҡабырсаҡ; **ра́ковина ули́тки** ҡусҡар ҡабырсағы **2.** раковина (*кран аҫтындағы махсус һауыт*) **3.** (*о некоторых органах и частях тела такой формы*) ҡабырсаҡ, япраҡ; **носова́я ра́ковина** танау ҡабырсағы; **ушна́я ра́ковина** ҡолаҡ япрағы **4.** *спец.* (*пустота в отлитом металле*) бушлыҡ, ҡыуышлыҡ, күҙәнәк; **уса́дочная ра́ковина** ултырыу ҡыуышлығы

**РА́КОВЫЙ I,** -ая, -ое ҡыҫала ...ы; **ра́ковая скорлупа́** ҡыҫала ҡабырсағы; **ра́ковые ше́йки** ҡыҫала муйындары; **ра́ковый суп** ҡыҫала ашы

**РА́КОВЫЙ II,** -ая, -ое рак ...ы, яман шеш ...ы; **ра́ковая о́пухоль** рак шеше

**РАКООБРА́ЗНЫЕ** *мн.*; *зоол.* ҡыҫала һымаҡтар

**РА́КУРС** и **РАКУ́РС** *м* ракурс (*перспектива-ла һүрәтләндерең*)

**РАКУ́ШЕЧНИК** *м* ҡабырсаҡ тоҡомдар (*ҡабырсаҡтарҙан торған күҙәнәкле эзбизташ тоҡомо*)

**РАКУ́ШЕЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡабырсаҡлы; **раку́шечный песо́к** ҡабырсаҡлы ҡом; **раку́шечная ули́тка** ҡабырсаҡлы ҡусҡар

**РАКУ́ШКА** *ж см.* **ра́ковина** 1

**РА́ЛЛИ** *с нескл.*; *спорт.* ралли (*махсус автомашиналар, мотоциклдар ярышы*)

**РА́МА** *ж* **1.** ҡыҫан, рам; **око́нная ра́ма** тәҙрә ҡыҫаны; **ра́мы для карти́н** картина ҡыҫандары **2.** *спец.* рам; **ра́ма автомоби́ля** автомобиль рамы; **ра́ма ваго́на** вагон рамы

**РА́МКА** *ж* **1.** бәләкәй ҡыҫан; **портре́т в ра́мке** ҡыҫандағы портрет **2.** *мн.* **ра́мки**; *перен.* сик, сит; **в ра́мках зако́на** закон сиктәрендә; **вы́йти за ра́мки те́мы** теманан ситкә сығыу **3.** *радио. см.* **ра́мочный** ♦ **вы́йти за ра́мки** арттырып ебәреү; **держа́ть себя́ в ра́мках (прили́чия)** үҙеңде әҙәпле тотоу

**РА́МНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫан …ы; **ра́мный заво́д** ҡыҫан заводы; **ра́мное стекло́** ҡыҫан быялаһы

**РА́МОЧНЫЙ,** -ая, -ое бәләкәй ҡыҫан …ы ♦ **ра́мочная анте́нна** *радио.* рам антенна (*рамка формаһындағы антенна*)

**РА́МПА** *ж*; *театр.* рампа (*сәхнәне яҡтырта торған ҡорамалдар һәм уларҙы тамашасыларҙан ҡаплап торған тәпәшәк барьер*)

**РА́НА** *ж* **1.** яра, йәрәхәт; **закры́тая ра́на** бөтәү яра; **тяжёлая ра́на** ауыр йәрәхәт; **перевяза́ть ра́ну** йәрәхәтте бәйләү; **заживле́ние ра́ны** яра уңалыу **2.** *перен.* (*душевная боль*) яра, йәрәхәт, ҡайғы; **ра́на, нанесённая сло́вом** тел яраһы; **серде́чная ра́на** йөрәк яраһы **3.** *перен.* (*вред, ущерб, причинённый чему-л.*) зыян, зарар, ҡаза ♦ **жива́я ра́на** *см.* **живо́й**

**РАНГ** *м*; *в разн. знач.* ранг, дәрәжә; **дипломати́ческие ра́нги** дипломатик дәрәжәләр; **капита́н пе́рвого ра́нга** беренсе ранг капитаны; **кре́йсер второ́го ра́нга** икенсе ранг крейсеры

**РАНГО́УТ** *м*; *мор.* рангоут (*караблдәрҙә елкәнде, сигнал билдәләрен күтәреү йәйланмаһы*)

**РАНЕВО́Й,** -ая, -ое яра …ы, йәрәхәт …ы; **ранева́я пове́рхность** яра өҫтө

**РА́НЕЕ** *нареч.* **1.** *сравн. ст. от* **ра́но** 1; **2.** *см.* **ра́ньше** 2

**РАНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **ра́нить** 1; **обстоя́тельства ране́ния** яраланыу сәбәптәре **2.** (*рана*) яра, йәрәхәт; **проника́ющее ране́ние** үтәләй тишелгән яра; **слепо́е ране́ние** һуҡыр яра (*пуля, ярсыҡ һ.б. тәндә ҡала*)

**РА́НЕНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яралы, йәрәхәтле; **ра́неный бое́ц** яралы һалдат; **ра́неная рука́** йәрәхәтле ҡул **2.** *в знач. сущ.* **ра́неный** *м* и **ра́неная** *ж* яралы; **перево́зка ра́неных** яралыларҙы күсереү

**РАНЕ́Т** *м* ранет (*алма сорты*)

**РА́НЕЦ** *м* ранец, (артмаҡлы) сумка; **ра́нец для книг** китап сумкаһы

**РАНЖИ́Р** *м* **1.** сафҡа теҙелеү **2.** *перен.* (*определённый порядок в чём-л.*) тәртип ♦ **по ранжи́ру**: 1) буйға ҡарап; 2) *перен.* әһәмиәткә ҡарап

**РАНИ́МОСТЬ** *ж* рәнйеүсәнлек, йәберләнеүсәнлек; **рани́мость души́** күңелдең рәнйеүсәнлеге

**РАНИ́МЫЙ,** -ая, -ое (тиҙ) рәнйеүсән (бирешеүсән, йәберһенеүсән), бирешә торған; **рани́мая нату́ра** тиҙ рәнйеүсән кеше; **рани́мая пси́хика** тиҙ бирешеүсән психика

**РА́НИТЬ** *сов., несов. кого-что* **1.** яралау, йәрәхәтләү; **ра́нить но́гу** аяҡты йәрәхәтләү **2.** *перен.* рәнйетеү, йәберләү, яралау, йәрәхәтләү; **ра́нить ду́шу** күңелде рәнйетеү; **ра́нить сло́вом** һүҙ менән йәберләү

**РА́ННИЙ,** -яя, -ее **1.** иртә, иртәнге, иртә килгән; **ра́нний час** иртәнге сәғәт; **ра́ннее у́тро** иртә таң менән; **ра́нняя весна́** иртә яҙ **2.** (*составляющий начальный этап чего-л.*) тәүге, беренсе, башланғыс, тәүге осор(ҙағы); **ра́нние произведе́ния писа́теля** яҙыусының тәүге әҫәрҙәре; **ра́нний феодали́зм** тәүге осор феодализм **3.** (*преждевременный*) иртә, иртә башланған (килгән), ваҡытынан алда, ваҡытһыҙ; **ра́нняя зима́** иртә килгән ҡыш; **ра́нняя смерть** ваҡытһыҙ үлем **4.** иртә өлгөрә торған, тәүге; **ра́нние о́вощи** тәүге йәшелсәләр; **ра́нняя пшени́ца** иртә өлгөрә торған бойҙай ♦ **из молоды́х да ра́нний** *см.* **молодо́й**

**РА́НО 1.** *нареч.* иртә, иртүк, алдынан; **ра́но у́тром** иртән иртүк, иртә таңдан; **приходи́ть ра́но** иртә килеү **2.** *нареч.* (*преждевременно*) иртә, ваҡытһыҙ, (ваҡытынан) алда (элек); **ра́но соста́риться** иртә ҡартайыу; **ра́но умере́ть** ваҡытынан алда үлеү **3.** *в знач. сказ., безл.* иртә (әле); **обе́дать ещё ра́но** төшкө ашҡа иртә әле ♦ **ра́но и́ли по́здно** иртәме, һуңмы (*барыбер булыр*)

**РАНТ** *м* рант (*аяҡ кейеменең өҫтө менән табанын тоташтырған күн ҡайма*); **сапоги́ с ра́нтом** рант менән тегелгән итек

**РАНТОВО́Й** и **РА́НТОВЫЙ,** -ая, -ое рантлы, рант ҡуйып тегелгән; **рантова́я о́бувь** рантлы аяҡ кейеме

**РАНТЬЕ́** *м нескл.* рантье (*ҡиммәтле ҡағыҙҙарҙан ингән килемгә һәм ссудаға килгән проценттар иҫәбенә йәшәүсе*)

**РАНЬ** *ж*; *разг.* иртә таң, бик иртә; **подня́лся в таку́ю рань** иртә таңдан торған

**РА́НЬШЕ** *нареч.* **1.** *сравн. ст. от* **ра́но** 1 иртәрәк, алдараҡ, элегерәк; **уе́хал ра́ньше нас** беҙҙән алдараҡ китте; **пришёл ра́ньше него́** унан иртәрәк килде **2.** (*за некоторое время до чего-л.*) элек, алда, -ғанға/-гәнгә тиклем, -һыҙ/-һеҙ, -майынса/-мәйенсә; **ра́ньше сро́ка** мөҙҙәттән алда **3.** (*прежде, сначала*) элек, башта, тәүҙә; **ра́ньше поду́май, пото́м говори́** элек уйла, унан

эйт **4.** элек, әүәл, борон; **ра́ньше здесь был лес** элек бында урман булған ♦ **ра́ньше вре́мени** көн элгәре (элек)

**РАПА́** *ж*; *спец.* рапа (*тоҙға бай булған күл һыуы*)

**РАПИ́РА** *ж* рапира (*фехтованиела ҡулланыла торған дүрт ҡырлы ҡорал*)

**РА́ПОРТ** *м* рапорт; **пода́ть ра́порт команди́ру** командирға рапорт биреү; **переда́ть ра́порт прави́тельству** хөкүмәткә рапорт тапшырыу

**РАПОРТИ́ЧКА** *ж*; *разг.* ҡыҫҡаса хисап

**РАПОРТОВА́ТЬ** *сов., несов.* рапорт биреү, хәбәр итеү, белдереү; **рапортова́ть руководи́телю** етәксегә рапорт биреү; **рапортова́ть о выполне́нии госзака́за** дәүләт заказын үтәү тураһында хәбәр итеү

**РАПС** м рапс (*әҫернә сәскәләр ғаиләһенә ҡараған майлы үҫемлек*)

**РА́ПСОВЫЙ,** -ая, -ое рапс ...ы; **ра́псовое ма́сло** рапс майы

**РАПСО́ДИЯ** *ж* рапсодия (**1.** *борондо грек-тарҙа эпик әҫәрҙәр өҙөгө* **2.** *халыҡ йырҙары темаларына яҙылған музыкаль әҫәр*); **Венге́рская рапсо́дия Ли́ста** Листың Венгр рапсодияһы

**РАРИТЕ́Т** *м*; *книжн.* раритет (*үтә һирәк осрай торған ҡиммәтле нәмә*)

**РАС...** *приставка см.* **раз...**

**РА́СА** *ж* раса; **монголо́идная ра́са** монголоид расаһы

**РАСИ́ЗМ** *м* расизм; **борьба́ про́тив раси́зма** расизмға ҡаршы көрәш

**РАСИ́СТ** *м* расист (*расизм яҡлы кеше*)

**РАСИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое расизм ...ы, расистик, расистар ...ы; **раси́стская тео́рия** расизм теорияһы; **раси́стский режи́м** расистик режим

**РАСКАБАЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* азат итеү, ҡотҡарыу; **раскабали́ть рабо́в** ҡолдарҙы азат итеү

**РАСКАБАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* азат ителеү, ҡоллоҡтан ҡотолоу

**РАСКАБАЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **раскабали́ть**

**РАСКАБАЛЯ́ТЬСЯ** *несов* **1.** *см.* **раскабали́ться 2.** *страд. от* **раскабаля́ть**

**РАСКА́ИВАТЬСЯ** *несов. см.* **раска́яться**

**РАСКАЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **раскали́ть 2.** *прил.* ҡыҙыу, эҫе, уттай ҡыҙған; **раскалённая печь** ҡыҙыу мейес; **раскалённое желе́зо** уттай ҡыҙған тимер; **раскалённый песо́к** эҫе ҡом

**РАСКАЛИ́ТЬ** *сов. что* ныҡ ҡыҙҙырыу (эҫетеү); **раскали́ть желе́зо** тимер ҡыҙҙырыу

**РАСКАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* бик ныҡ ҡыҙыу (эҫеү); **печь раскали́лась** мейес бик ныҡ ҡыҙған

**РАСКА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **расколо́ть**

**РАСКА́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1. расколо́ться 2.** *страд. от* **раска́лывать**

**РАСКАЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **раскали́ть**

**РАСКАЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раскали́ться 2.** *страд. от* **раскаля́ть**

**РАСКА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **раскопа́ть**

**РАСКА́РМЛИВАТЬ** *несов. см.* **раскорми́ть**

**РАСКА́Т I** *м* **1.** *см.* **раската́ть** — **раска́тывать** I, **раската́ться** 1 — **раска́тываться** 1; **2.** кәйелтмәк, ҡағылма, салыу (*алып барып һуға (кәйелтә) торған ҡырын урын*); **доро́га с раска́тами** кәйелтмәкле юл **3.** *уст.* урын, ур (*кәлгәгә туп ҡуя торған, төйөп тигеҙләнгән урын*)

**РАСКА́Т II** *м* **1.** *см.* **раскати́ть** — **раска́тывать** II, **раскати́ться** — **раска́тываться** II; **раска́т волны́** тулҡындар таралыуы **2.** (*разгон*) (алған) тиҙлек, тиҙлек алыу, ҡыҙыулап китеү; **переверну́ться на всём раска́те** алған тиҙлектә түңкәрелеү **3.** *обычно мн.* **раска́ты** (*длительный, прерывистый гул*) гөрһөлдәү, дөһөрләү, күкрәү; **раска́ты гро́ма** күк дөһөрләүе **4.** *мн.* **раска́ты** (өҙөк-өҙөк, яңғырауыҡлы, яңғыратып) тауыш, һайраған тауыш; **раска́ты сме́ха** яңғыратып көлгән тауыш; **голоси́стые раска́ты жа́воронков** һабан турғайҙарының яңғырауыҡлы тауыштары

**РАСКАТА́ТЬ** *сов. что* **1.** йәйеү, йәйеп ебәреү, таратыу; **раската́ть ковёр** келәм йәйеү **2.** тәгәр(л)әтеп (таратып) ебәреү, тәгәр(л)әтеп (таратып) ташлау; **раската́ть брёвна** бүрәнәләрҙе тәгәрәтеп ебәреү **3.** тәгәр(л)әтеү, тәгәр(л)әтеп тигеҙләү; **раската́ть бельё катко́м** йыуылған керҙе бәләк менән тәгәрәтеп тигеҙләү **4.** шыуып тайғаҡлау (тигеҙләү, шымартыу); **раската́ть лёд** боҙҙо шыуып тигеҙләү **5.** йәйеү; **раската́ть те́сто** ҡамыр йәйеү

**РАСКАТА́ТЬСЯ I** *сов.* **1.** яҙылыу, һүтелеп китеү; **ковёр раската́лся** келәм яҙылды **2.** йәйелеү

**РАСКАТА́ТЬСЯ II** *несов.*; *разг.* шәберәк йөрөй (шыуа) башлау

**РАСКА́ТИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** яңғырап (шаңғырап) торған, гөрһөлдәгән; **разда́лся раска́тистый уда́р гро́ма** күктең гөрһөлдәгән тауышы ишетелде **2.** яңғырауыҡлы, яңғырап торған; **раска́тистый смех** яңғырауыҡлы көлөү

**РАСКАТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡыҙҙырып ебәреү, тиҙлек биреү, әйләндереп ебәреү; **раскати́ть колесо́** тәгәрмәсте әйләндереп ебәреү **2.** тәгәр(л)әтеп (таратып) ебәреү (ташлау); **раскати́ть бо́чки** мискәләрҙе тәгәрәтеп ебәреү; **раскати́ть брёвна** бүрәнәләрҙе таратып ташлау

**РАСКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡыҙып (әйләнеп, шыуып, ҡыҙыулап) китеү; **по́д гору теле́га раскати́лась** тау аҫтына табан арба ҡыҙыулап китте **2.** (*в разные стороны*) тәгәрәп (таралып) китеү; **я́блоки раскати́лись** алмалар тәгәрәп китте **3.** (*разнестись*) таралыу; **вы́стрел раскати́лся по реке́** атыу тауышы йылға буйлап таралды

**РАСКА́ТЫВАТЬ I** *несов. см.* **раската́ть**

**РАСКА́ТЫВАТЬ II** *несов.* **1.** *см.* **раскати́ть 2.** ҡыҙырып (күп) йөрөү; **раска́тывать по куро́ртам** курорттарҙа күп йөрөү

**РАСКА́ТЫВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **раска́таться** I; **2.** *страд. от* **раска́тывать** I

**РАСКА́ТЫВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **раскати́ться 2.** *страд. от* **раска́тывать** II 1

**РАСКАЧА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** бәүелдереү, сайҡалдырыу, тирбәлдереү, һелкетеп бәүелдереп (сайҡалдырып, тирбәлдереп) ебәреү; **раскача́ть каче́ли** бәүелсәк бәүелдереү; **раскача́ть ма́ятник** сәғәт телен тирбәлдереү **2.** киҙәнеп ырғытыу (һелтәү, сорғотоу); **раскача́ть грана́ту и ки́нуть** гранатаны киҙәнеп сорғотоу **3.** *разг.* (*качая, расшатать*) ҡаҡшатыу, ҡупшытыу, ҡумшытыу, бушатыу; **раскача́ть стул** ултырғысты ҡаҡшатыу; **раскача́ть зуб** теште ҡупшытыу **4.** *перен.*, *разг.* ҡуҙғатыу, ҡуҙғытыу, ҡуҙғатып (ҡуҙғытып) ебәреү, уятыу, дәртләндереү; **его́ не раскача́ешь** уны ҡуҙғатып ебәрә алмаҫһың

**РАСКАЧА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бәүелеү, сайҡалыу, тирбәлеү, бәүелеп (сайҡалып, тирбәлеп) китеү; **каче́ли раскача́лись** бәүелсәк бәүелеп китте; **ма́ятник раскача́лся** сәғәт теле тирбәлеп китте **2.** *разг.* ҡаҡшау, ҡупшыу, ҡумшыу, бушау; **столб раскача́лся** бағана бушаны **3.** *перен.*, *разг.* ҡуҙғалыу, уяныу, дәртләнеү, эшкә тотоноу; **наро́д раскача́лся** халыҡ эшкә тотондо

**РАСКА́ЧИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **раскача́ть 2.** *чем* бәүелтеү, болғау, сайҡау; **раска́чивать нога́ми** аяҡтарҙы болғау

**РАСКА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раскача́ться 2.** *разг.* сайҡалыу, аушанлау, һалпанлау, һәлпәнләү; **шага́ть раска́чиваясь** сайҡалып атлау **3.** *страд. от* **раска́чивать** 1

**РАСКА́ЧКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **раскача́ть** — **раска́чивать**, **раскача́ться** — **раска́чиваться**; **раска́чка ваго́нов** вагондарҙың сайҡалыуы **2.** (*походка с покачиванием*) сайҡалыу, аушанлау

**РАСКА́ШЛЯТЬСЯ** *сов.* туҡтауһыҙ йүткереү (йүтәлләү), ҡаты йүткерә башлау; **больно́й раска́шлялся** ауырыу ҡаты йүткерә башланы

**РАСКА́ЯНИЕ** *с* үкенес, тәүбә; **испы́тывать раска́яние** үкенес кисереү

**РАСКА́ЯТЬСЯ** *сов.* үкенеү, тәүбә итеү, тәүбәгә килеү; **раска́яться в свои́х посту́пках** үҙ ҡылыҡтарыңа үкенеү

**РАСКВАРТИРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* фатирҙарға урынлаштырыу; **расквартирова́ть солда́т** һалдаттарҙы фатирҙарға урынлаштырыу

**РАСКВАРТИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* фатирға төшөү (урынлашыу); **расквартирова́ться у знако́мых** таныштарға фатирға төшөү

**РАСКВАРТИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **расквартирова́ть**

**РАСКВАРТИРО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расквартирова́ться 2.** *страд. от* **расквартиро́вывать**

**РАСКВА́СИТЬ** *сов. что*; *прост.* **1.** ҡанатыу, һуғып ҡанатыу, ҡаната һуғыу, туҙҙыра һуғыу; **расква́сить нос** танауын ҡаната һуғыу **2.** боҙоу, батҡаҡлау, иҙеү; **дожди́ расква́сили доро́гу** ямғырҙар юлды боҙҙо

**РАСКВА́СИТЬСЯ** *сов.*; *прост.* **1.** батҡаҡлау, батҡаҡҡа әйләнеү, иҙелеү; **от дождя́ доро́ги расква́сились** ямғырҙан юлдар батҡаҡҡа әйләнде **2.** *перен.* бошоноп илау, ебеү, ебеп китеү (төшөү); **расква́ситься от го́ря** ҡайғынан ебеп төшөү

**РАСКВА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **расква́сить**

**РАСКВА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расква́ситься 2.** *страд. от* **расква́шивать**

**РАСКВИТА́ТЬСЯ** *сов. с кем*; *разг.* **1.** иҫәпләшеү, хисаплашыу, иҫәп-хисапты өҙөү; **расквита́ться с должника́ми** бурыслы кешеләр менән иҫәп-хисапты өҙөү **2.** *перен.* (*отомстить*) үс алыу, ҡон ҡайтарыу, иҫәпләшеү; **расквита́ться с враго́м** дошмандан үс алыу

**РАСКИДА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** таратыу, таратып ташлау, ырғытыу; **раскида́ть наво́з** тиреҫ таратыу; **раскида́ть стог** кәбәнде таратып ташлау **2.** туҙҙырыу, туҙҙырып ташлау; **раскида́ть бума́ги на столе́** ҡағыҙҙарҙы өҫтәлгә туҙҙырып ташлау **3.** *перен.*, *разг.* таратыу, таратып ебәреү, ташлау; **судьба́ раскида́ла друзе́й** яҙмыш дуҫтарҙы таратты **4.** *перен.*, *разг.* (*истратить зря*) туҙҙырыу, тотоноп бөтөү; **раскида́ть иму́щество** мөлкәтте туҙҙырыу

**РАСКИДА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** йәйелеп ултырыу (ятыу); **раскида́ться в посте́ли** урында йәйелеп ятыу **2.** (*распуститься — о волосах*) һүтелеп таратылыу, туҙғыу **3.** (*расположиться беспорядочно*) тарау урынлашыу (ятыу); **постро́йки раскида́лись по двору́** ҡаралтылар ишек алдына тарау урынлашҡан

**РАСКИ́ДИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*развесистый*) тарбағай, тармаҡлы, (киң) йәйелеп (тармаҡланып) үҫкән; **раски́дистое де́рево** тармаҡланып үҫкән ағас **2.** (*широкий, просторный*) йәйенке, киң; **раски́дистая тахта́** киң тахта

**РАСКИДНО́Й,** -ая, -ое йәйелмәле, тағатмалы, йыйылмалы, ҙурайтыла торған; **раскидно́й стол** ҙурайтыла торған өҫтәл

**РАСКИ́ДЫВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **раскида́ть 2.** *см.* **раски́нуть**

**РАСКИ́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раски́нуться 2.** *страд. от* **раски́дывать**

**РАСКИ́НУТЬ** *сов. что* **1.** тарбайтыу, йәйеү, йәйеп ебәреү (ташлау); **раски́нуть ру́ки** ҡулдарҙы йәйеп ебәреү **2.** (*разложить*) йәйеп һалыу, таратып ташлау, йәйеү; **раски́нуть ковёр** келәм йәйеп һалыу; **раски́нуть сеть** ау йәйеү **3.** йәйелеү, урын алыу, урынлаштырыу; **раски́нуть ла́герь** лагерь урынлаштырыу **4.** (*охватить*) йәйеп ебәреү, йәйелдереү, күбәйтеү; **раски́нуть торго́вую се́ть** сауҙа селтәрен йәйелдереү **5.** (*раскрыть что-л. сложенное*) ҡороу, ҡороп ҡуйыу; **раски́нуть пала́тку** палатка ҡороу ♦ **раски́нуть ка́рты** кәрт һалыу; **раски́нуть умо́м** уйлап ҡарау, уй йүгертеү, һәр яҡлап уйлау

**РАСКИ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* йәйелеп (һуҙылып, йәйрәп) ятыу; **раски́нуться на посте́ли** түшәккә һуҙылып ятыу **2.** урынлашыу, һуҙылыу, һуҙылып китеү, йәйелеп ултырыу, йәйрәп ятыу; **ла́герь раски́нулся на возвы́шенности** лагерь ҡалҡыулыҡҡа урынлашҡан; **далеко́ раски́нулась степь** дала алыҫҡа йәйрәп ята

**РАСКИПА́ТЬСЯ** *несов. см.* **раскипе́ться** 2

**РАСКИПЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** урғып (ныҡ) ҡайнай башлау; **самова́р раскипе́лся** самауыр урғып ҡайнай башланы **2.** *перен.* ҡыҙыу, ярһыу, ҡыҙып (ярһып) китеү; **се́рдце раскипе́лось** йөрәк ярһыны

**РАСКИПЯТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡыҙып (ярһып, дыулап) китеү

**РАСКИСА́ТЬ** *несов. см.* **раски́снуть**

**РАСКИ́СНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*о тесте*) әсеү; (*о дороге*) иҙелеү, батҡаҡланыу; **те́сто раски́сло** ҡамыр әсене **2.** *перен.* әлһерәү, хәлһеҙләнеү, бәлйерәү, бәлйерәп төшөү; **раски́снуть от жары́** эҫелектән бәлйерәп төшөү **3.** *перен.* ебеү, күңел (төшөү) йомшарыу, ебеп төшөү; **он совсе́м раски́с** ул бөтөнләй ебеп төштө

**РАСКЛА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **раскла́дывать**; **раскла́дка карт** кәрт һалыу **2.** (*расположение в каком-л. порядке*) бүлеү, бүлгеләү, бүлеп биреү **3.** *спец.* (*перечень продуктов с указанием их пропорции для приготовления пищи*) тупланма; **раскла́дка проду́ктов** аҙыҡ тупланмаһы

**РАСКЛАДНО́Й, -ая, -ое** йәйелмәле, асылмалы, һүтелмәле, йыйылмалы; **раскладно́й стол** йыйылмалы өҫтәл

**РАСКЛА́ДОЧНЫЙ, -ая, -ое** бүлеп (таратып) һала торған; **раскла́дочная маши́на** бүлеп һала торған машина

**РАСКЛАДУ́ШКА** *ж*; *разг.* йыйылмалы карауат; **уложи́ть ребёнка на раскладу́шку** баланы йыйылмалы карауатҡа һалыу

**РАСКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **разложи́ть** 1—4

**РАСКЛА́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разложи́ться** 1; **2.** *страд. от* **раскла́дывать**

**РАСКЛА́НИВАТЬСЯ** *несов. см.* **раскла́няться**

**РАСКЛА́НЯТЬСЯ** *сов.* **1.** баш эйеү (*хөрмәт менән*); **раскла́няться пе́ред зри́телями** тамашасылар алдында баш эйеү **2.** (*при встрече или прощании*) баш эйеп сәләмләшеү (иҫәнләшеү, хушлашыу); **раскла́няться со все́ми** бөтәһе менән баш эйеп иҫәнләшеү

**РАСКЛЕВА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*клювом пробить во многих местах*) суҡып тишеп бөтөрөү; **пти́цы расклева́ли мешо́к** ҡоштар тоҡто суҡып тишеп бөтөргән **2.** (*склевать всё*) ашап бөтөрөү; **ку́рица расклева́ла подсо́лнух** тауыҡ көнбағышты ашап бөтөрҙө

**РАСКЛЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **расклева́ть**

**РАСКЛЁВЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **расклёвывать**

**РАСКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **раскле́ить**

**РАСКЛЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раскле́иться 2.** *страд. от* **раскле́ивать**

**РАСКЛЕ́ИТЬ** *сов. что* **1.** ҡуптарып (һыҙырып) алыу, асыу (*йәбештергәнде*); **раскле́ить конве́рт** йәбештерелгән конвертты асыу **2.** (*наклеить повсюду*) йәбештереп сығыу (бөтөрөү); **раскле́ить афи́ши** афишалар йәбештереп сығыу

**РАСКЛЕ́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡубыу, ҡубып сығыу, айырылыу, асылыу; **паке́т раскле́ился** пакет асылған **2.** *перен.*, *разг.* (*разладиться*) боҙолоу, емерелеү, барып сыҡмау; **де́ло раскле́илось** эш барып сыҡманы **3.** *перен.*, *разг.* (*разболеться*) ауырып китеү, хәлһеҙләнеү

**РАСКЛЕ́ЙКА** *ж см.* **раскле́ить** — **раскле́ивать**

**РАСКЛЕ́ЙЩИК** *м* и **РАСКЛЕ́ЙЩИЦА** *ж* йәбештереүсе (*афишалар, белдереүҙәр һ.б.*)

**РАСКЛЕПА́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡуптарыу, айырыу, һүтеү; **расклепа́ть цепь** сынйырҙы айырыу **2.** (*ударяя по чему-л., расплющить*) һуғып йәмшәйтеү, ялпаҡлау; **расклепа́ть заклёпку** сигәне һуғып йәмшәйтеү

**РАСКЛЕПА́ТЬСЯ** *сов.* сигәһе (сейнәүе) ҡубыу, ҡубып төшөү, таралыу; **котёл расклепа́лся** ҡаҙандың сейнәүе ҡубып төшкән

**РАСКЛЁПЫВАТЬ** *несов. см.* **расклепа́ть**

**РАСКЛЁПЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расклепа́ться 2.** *страд. от* **расклёпывать**

**РАСКЛЁШИВАТЬ** *несов. см.* **расклёшить**

**РАСКЛЁШИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **расклёшивать**

**РАСКЛЁШИТЬ** *сов. что*; *разг.* киң итәкле (балаҡлы) итеп бесеү; **расклёшить ю́бку** юбканы киң итәкле итеп бесеү

**РАСКЛИ́НИВАТЬ** *несов. см.* **расклини́ть**

**РАСКЛИ́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расклини́ться 2.** *страд. от* **раскли́нивать**

**РАСКЛИНИ́ТЬ** и **РАСКЛИ́НИТЬ** *сов. что* **1.** (*выбить клин*) шынаһын сығарыу **2.** (*вбив клин, расщепить*) шыналап ярыу

**РАСКЛИНИ́ТЬСЯ** и **РАСКЛИ́НИТЬСЯ** *сов.* шынанан (шына ҡағыуҙан) ярылыу

**РАСКОВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*о лошади*) дағаһын алыу (һалдырыу) **2.** (*освободить от оков*) бығауҙы ысҡындырыу, бығауын һалдырыу **3.** *тех.* (*сплющить ковкой*) сүкеп йәйеү (йоҡартыу)

**РАСКОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о лошади*) дағаһы төшөп ҡалыу, дағаһы ысҡыныу; **ло́шадь раскова́лась** аттың дағаһы төшөп ҡалған **2.** (*освободиться от оков*) бығауҙан ҡотолоу (ысҡыныу)

**РАСКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **раскова́ть**

**РАСКО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** **раскова́ться 2.** *страд. от* **раско́вывать**

**РАСКОВЫ́РИВАТЬ** *несов. см.* **расковыря́ть**

**РАСКОВЫ́РИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **расковы́ривать**

**РАСКОВЫРЯ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (*сделать отверстие, углубление и т.п.*) соҡоп тишеү, соҡоп тишеп сығарыу, соҡоп киңәйтеү (ҙурайтыу, тишеү), соҡорлап бөтөү; **расковыря́ть дыру́** тишекте соҡоп киңәйтеү **2.** соҡоп алыу, тырнап аҙҙырыу (*яраны, шешекте*); **расковыря́ть боля́чку** һыҙлауыҡты тырнап аҙҙырыу

**РАСКО́Л** *м* **1.** *см.* **расколо́ть** — **раска́лывать**, **расколо́ться** — **раска́лываться**; **раско́л мра́мора** мәрмәрҙе ярыу; **раско́л па́ртии** партияның бүленеүе **2.** *рел.* раскол (*XVII б. уртаһында официаль сиркәүгә ҡаршы йүнәлдерелгән дини хәрәкәт*)

**РАСКОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **расколоти́ть**

**РАСКОЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расколоти́ться** **2.** *страд. от* **раскола́чивать**

**РАСКОЛДОВА́ТЬ** *сов. кого-что* сихырҙан арындырыу (ҡотҡарыу), сихыр ҡайтарыу

**РАСКОЛОТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* һуғып ватыу (аҡтарыу, һүтеү), ватыу; **расколоти́ть ссо́хшиеся ко́мья** кибеп йәбешкән киҫәктәрҙе һуғып ватыу **2.** (*ударяя по чему-л., расплющить*) һуҡҡылап киңәйтеү (ялпайтыу, йәмшәйтеү) **3.** *прост.* ватыу, ярыу; **расколоти́ть посу́ду** һауыт-һабаны ватыу **4.** (*разбить что-л. сколоченное*) һуғып асыу; **расколоти́ть я́щик** йәшникте һуғып асыу

**РАСКОЛОТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* ватылыу, емерелеү, таралып китеү

**РАСКОЛО́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ярыу, ярып ташлау (бөтөрөү); **расколо́ть дрова́** утын ярыу **2.** *кого-что*; *перен.* тарҡатыу, айырыу, бүлеү; **расколо́ть еди́нство** берҙәмлекте тарҡатыу

**РАСКОЛО́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ярылыу, ярылып сығыу (бөтөү, китеү), ватылыу; **поле́но расколо́лось** түмәр ярылды **2.** *перен.* тарҡалыу, айырылыу, бүленеү; **класс расколо́лся** класс бүленде

**РАСКОЛЫХА́ТЬ** *сов. что* бик ныҡ сайҡалдырыу (тулҡынландырыу, һелкетеү, бәүелдереү, елберләтеү); **ве́тер расколыха́л знамёна** ел байраҡтарҙы бик ныҡ елберләтте

**РАСКОЛЫХА́ТЬСЯ** *сов.* бик ныҡ сайҡалыу, сайҡала (тулҡынлана) башлау, хәрәкәткә килеү

**РАСКО́ЛЬНИК** *м* и **РАСКО́ЛЬНИЦА** *ж* **1.** расколсы (*айырым бер дини мәҙһәптә торосы*) **2.** *перен.* тарҡатыусы, бола таратыусы

**РАСКО́ЛЬНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** расколсы(лар) ...ы; **раско́льнический скит** расколсылар скиты **2.** (*способствующий расколу*) тарҡатыусы(лар) ...ы, тарҡатыусылыҡ ...ы; **раско́льнические де́йствия** тарҡатыусылар эштәре

**РАСКО́ЛЬНИЧИЙ,** -ья, -ье расколсы(лар) ...ы; **раско́льничьи кни́ги** расколсылар китаптары; **раско́льничьи скиты́** расколсылар скиты

**РАСКОНОПА́ТИТЬ** *сов. что* сүсен (мүген) алыу, (тишеген) асыу, алып ташлау; **расконопа́тить ще́ли** ярыҡтарҙы асыу

**РАСКОНОПА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **расконопа́тить**

**РАСКОПА́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡаҙыу, ҡаҙып ташлау (бөтөрөү); **раскопа́ть зе́млю** ерҙе ҡаҙып ташлау; **раскопа́ть я́му** соҡор ҡаҙыу **2.** (ҡаҙып) табыу, табып алыу, ҡаҙып сығарыу (асыу); **раскопа́ть дре́вний го́род** боронғо ҡаланы ҡаҙып табыу; **раскопа́ть родни́к** шишмә ҡаҙыу **3.** *разг.* эҙләп табыу, ҡаҙып сығарыу, табыу; **раскопа́ть ста́рую фотогра́фию** иҫке фотографияны эҙләп табыу

**РАСКО́ПКА** *ж* **1.** *см.* **раскопа́ть** — **раскапывать** 1, 2; **2.** *мн.* **раско́пки** (*работа по извлечению предметов древности*) ҡаҙыу, ҡаҙыу (эш(тәр)е); **заня́ться раско́пками** ҡаҙыу эштәре менән шөғөлләнеү **3.** *мн.* **раско́пки** (*место, где производится такая работа*) ҡаҙылма(лар); **археологи́ческие раско́пки** археологик ҡаҙылмалар

**РАСКОРМИ́ТЬ** *сов. кого* (ныҡ) ашатыу, һимертеү, көрәйтеү; **раскорми́ть ло́шадь** атты һимертеү

**РАСКО́РМЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **раскорми́ть** **2.** *прил.*; *разг.* һимеҙ, көр; **раско́рмленная свинья́** һимеҙ сусҡа

**РАСКОРЧЕВА́ТЬ** *сов. что* төпләү, төптәрҙе алыу, таҙартыу; **раскорчева́ть куста́рники** ҡыуаҡтарҙы төпләү

**РАСКОРЧЁВКА** *ж* **1.** *см.* **раскорчева́ть** — **раскорчёвывать**; **раскорчёвка ле́са** урман төпләү **2.** *разг.* таҙартыла торған урын

**РАСКОРЧЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **раскорчева́ть**

**РАСКОРЧЁВЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **раскорчёвывать**

**РАСКОРЯ́КА** *м* и *ж*; *прост.* кәкре аяҡ, ҡамыт аяҡ

**РАСКОРЯ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **раскоря́чить**

**РАСКОРЯ́ЧИВАТЬСЯ** *несов. см.* **раскоря́читься**

**РАСКОРЯ́ЧИТЬ** *сов. что*; *прост.* тарбайтыу; **раскоря́чить но́ги** аяҡтарҙы тарбайтыу

**РАСКОРЯ́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *прост.* (аяҡтар) тарбайыу

**РАСКО́С** *м*; *спец.* ҡыйыш терәү (терәк)

**РАСКО́СОСТЬ** *ж* **1.** ҡыҫыҡ күҙлелек **2.** (*расходящееся косоглазие*) ҡылыйлыҡ

**РАСКО́СЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*имеющий косой разрез — о глазах*) ҡыҫыҡ (*күҙ*); **раско́сые глаза́** ҡыҫыҡ күҙҙәр **2.** (*страдающий косоглазием*) ҡылый (күҙле); **быть раско́сым** ҡылый булыу; **раско́сый ма́льчик** ҡылый күҙле малай **3.** *разг.* (*наклонный*) ҡыя, ҡырын, ауыш; **раско́сые лучи́ со́лнца** ҡояштың ҡыя нурҙары

**РАСКОШЕ́ЛИВАТЬСЯ** *несов. см.* **раскоше́литься**

**РАСКОШЕ́ЛИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* аҡса тотоноу (туҙҙырыу), йомартланып китеү; **раскоше́литься на пода́рок** бүләккә аҡса тотоноу

**РАСКРА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **раскра́сть**

**РАСКРА́ДЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **раскра́дывать**

**РАСКРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **раскрои́ть**

**РАСКРА́ИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **раскра́ивать**

**РАСКРАСА́ВЕЦ** *м* и **РАСКРАСА́ВИЦА** *ж*; *разг.* матур, сибәр, һылыу

**РАСКРА́СИТЬ** *сов. кого-что* төрлө төҫкә буяу, буяп бөтөрөү, матурлап буяу; **раскра́сить альбо́м** альбомды матурлап буяу

**РАСКРА́СИТЬСЯ** *сов.* төрлө төҫкә буялыу, төҫлө булыу

**РАСКРА́СКА** *ж* **1.** *см.* **раскра́сить – раскра́шивать 2.** биҙәк, төҫ; **я́ркая раскра́ска** асыҡ төҫ; **си́тец пёстрой раскра́ски** сыбар биҙәкле ситса

**РАСКРАСНЕ́ТЬСЯ** *сов.* ныҡ ҡыҙарыу, ҡыҙарып китеү, ҡып-ҡыҙыл булыу; **раскрасне́ться от моро́за** һыуыҡтан ныҡ ҡыҙарыу; **глаза́ раскрасне́лись** күҙҙәре ныҡ ҡыҙарған

**РАСКРА́СТЬ** *сов. что* урлап бөтөрөү (китеү)

**РАСКРА́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **раскра́сить 2.** *прил.* буялған, буяулы; **раскра́шенные сте́ны** буяулы стеналар **3.** *прил.*; *разг.* ныҡ (артыҡ) биҙәнгән (буялған); **раскра́шенная же́нщина** ныҡ биҙәнгән ҡатын

**РАСКРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **раскра́сить**

**РАСКРА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раскра́ситься 2.** *страд. от* **раскра́шивать**

**РАСКРЕПИ́ТЬ** *сов. что*; *спец.* терәүҙәрен алыу, ысҡындырып сығарыу; **раскрепи́ть ба́лку** урҙаны ысҡындырып сығарыу

**РАСКРЕПИ́ТЬСЯ** *сов.*; *спец.* (терәүҙән) айырылыу (ысҡыныу), айырылып сығыу, бушау; **подпо́рка раскрепи́лась** терәү бушаған

**РАСКРЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **раскрепи́ть**

**РАСКРЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раскрепи́ться 2.** *страд. от* **раскрепля́ть**

**РАСКРЕПОСТИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *ист.* крепостнойлыҡтан ҡотҡарыу (азат итеү); **раскрепости́ть крестья́н** крәҫтиәндәрҙе крепостнойлыҡтан ҡотҡарыу **2.** *перен.* азат итеү, иҙелеүҙән ҡотҡарыу; **раскрепости́ть же́нщину** ҡатын-ҡыҙҙы азат итеү

**РАСКРЕПОСТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *ист.* крепостнойлыҡтан ҡотолоу **2.** *перен.* иҙеүҙән ҡотолоу, азат ителеү (булыу), азатлыҡҡа сығыу

**РАСКРЕПОЩА́ТЬ** *несов. см.* **раскрепости́ть**

**РАСКРЕПОЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раскрепости́ться 2.** *страд. от* **раскрепоща́ть**

**РАСКРЕПОЩЕ́НИЕ** *с см.* **раскрепости́ть – раскрепоща́ть**, **раскрепости́ться – раскрепоща́ться**; **раскрепоще́ние крестья́н** крәҫтиәндәрҙе крепостнойлыҡтан азат итеү; **раскрепоще́ние рабо́в** ҡолдарҙы азат итеү

**РАСКРИТИКОВА́ТЬ** *сов.* ҡаты тәнҡитләү, ныҡ тәнҡит итеү, тетеп һалыу (ташлау); **раскритикова́ть молодо́го а́втора** йәш авторҙы ҡаты тәнҡитләү

**РАСКРИТИКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **раскритикова́ть**

**РАСКРИЧА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** ҡысҡырырға тотоноу, ҡысҡыра башлау, шау-шыу күтәреү, тауыш (ғауға) ҡуптарыу; **ребёнок раскрича́лся** бала ҡысҡырырға тотондо **2.** аҡырыныу, аҡыра (екерә) башлау, аҡырырға (екерергә) тотоноу; **раскрича́ться на дете́й** балаларға аҡыра башлау

**РАСКРОВЕНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* ҡанатыу, ҡанатып бөтөрөү; **раскровени́ть ру́ки** ҡулдарҙы ҡанатып бөтөрөү

**РАСКРОИ́ТЬ** *сов. что* **1.** бесеү, киҫеү; **раскрои́ть пла́тье** күлдәк бесеү **2.** *разг.* (*рассечь*) яра (вата) һуғыу, ярып (киҫеп) сығарыу

**РАСКРО́Й** *м* **1.** *см.* **раскрои́ть – раскра́ивать** 1; **раскро́й тка́ней** тауарҙы бесеү **2.** (*то, что раскроено*) беселгән әйбер, бесем

**РАСКРО́ЙКА** *ж см.* **раскрои́ть – раскра́ивать** 1; **систе́ма раскро́йки** бесеү системаһы; **спо́соб раскро́йки** киҫелеү (киҫелеш) рәүеше

**РАСКРО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое бесеү ...ы, киҫеү ...ы; **раскро́йный план** киҫеү планы; **раскро́йный цех** бесеү цехы

**РАСКРОМСА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* өҙгөләп (киҫәкләп, тураҡлап) бөтөрөү, киҫкеләп (тураҡлап, мөнтәп) ташлау; **раскромса́ть бума́гу** ҡағыҙҙы киҫкеләп ташлау

**РАСКРОШИ́ТЬ** *сов. что* ыуалтыу, тураҡлау, ваҡлап (тураҡлап, онтап) бөтөрөү; **раскроши́ть хлеб** икмәкте ваҡлап бөтөрөү

**РАСКРОШИ́ТЬСЯ** *сов.* валсыҡланыу, ыуалыу, онталыу; **бу́лка раскроши́лась** күмәс валсыҡланған; **зуб раскроши́лся** теш ыуалған

**РАСКРУТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** һүтеү, тағатыу; **раскрути́ть верёвку** арҡан һүтеү; **раскрути́ть руло́н** төргәк тағатыу **2.** *прост.* (*развинтить*) бороп бушатыу; **раскрути́ть кран** һемәкте бороп бушатыу **3.** *разг.* (*крутя, придать вращательное движение*) ныҡ өйөрөлтөү (әйләндереү)

**РАСКРУТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һүтелеү, тағатылыу; **кана́т раскрути́лся** канат тағатылған **2.** *прост.* (*развинтиться*) бушау **3.** *разг.* ныҡ өйөрөлә (әйләнә) башлау

**РАСКРУ́ТКА** *ж см.* **раскрути́ть – раскру́чивать**, **раскрути́ться – раскру́чиваться**

**РАСКРУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **раскрути́ть**

**РАСКРУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раскрути́ться 2.** *страд. от* **раскру́чивать**

**РАСКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **раскры́ть**

**РАСКРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раскры́ться 2.** *страд. от* **раскрыва́ть**

**РАСКРЫ́ТИЕ** *с см.* **раскры́ть – раскры́ться**; **раскры́тие зако́нов приро́ды** тәбиғәт ҡанундарын асыу; **раскры́тие противоре́чий** ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы асыу; **раскры́тие парашю́та** парашютты асып ебәреү

**РАСКРЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **раскры́ть 2.** *прил.* асылған, асыҡ; **раскры́тая грудь** асыҡ түш

**РАСКРЫ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** асыу, асып ебәреү (ҡуйыу); **раскры́ть воро́та** ҡапҡаны асыу; **раскры́ть глаза́** күҙҙе асыу; **раскры́ть сунду́к** һандыҡты асып ҡуйыу **2.** асыу, йәйеү, йәйеп (асып, яҙып) ебәреү; **раскры́ть зо́нтик** ҡулсатырҙы яҙып ебәреү; **раскры́ть кры́лья** ҡанаттарҙы йәйеп ебәреү **3.** *перен.* асыу, фаш итеү, асыҡлау; **раскры́ть преступле́ние** енәйәтте фаш итеү; **раскры́ть та́йну** серҙе асыу **4.** *перен.* асыу, тикшереп белеү; **раскры́ть секре́ты бессме́ртия** үлемһеҙлектең серҙәрен тикшереп белеү **5.** *перен.* асыу, асып һалыу, аңлатып биреү, һөйләү; **раскры́ть иде́ю рома́на** романдың идеяһын асыу ♦ **раскры́ть глаза́** *кому, на кого-что* күҙен асыу; **раскры́ть игру́** йәшерен ниәтен асыу (һиҙеү); **раскры́ть свои́ ка́рты** ниәттәреңде асып биреү (әйтеү); **раскры́ть объя́тия** ҡолас йәйеп ҡаршы алыу; **раскры́ть рот**: 1) тел асылыу; 2) шаҡ ҡатыу, аптырау

**РАСКРЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** асылыу, асылып китеү; **дверь раскры́лась** ишек асылып китте; **за́навес раскры́лся** шаршау асылды; **глаза́ раскры́лись** күҙҙәр асылды **2.** асылыу, йәйелеү, яҙылыу; **зо́нтик раскры́лся** ҡулсатыр яҙылды; **кни́га раскры́лась** китап асылды **3.** өҫтөн асыу, асылыу; **раскры́ться во сне** йоҡлағанда өҫтө асыу **4.** асылыу, йәйелеп (йәйрәп) ятыу; **пе́ред на́ми раскры́лась степь** беҙҙең алда дала йәйрәп ята ине **5.** *перен.* беленеү, сиселеү, асылыу; **раскры́лась душе́вная красота́** күңел матурлығы асылды; **раскры́лся но́вый мир** яңы донъя асылды **6.** *перен.* фаш ителеү, асылыу; **раскры́лись престу́пные за́мыслы враго́в** дошмандарҙың енәйәтсел ниәттәре фаш ителде; **престу́пник раскры́лся** енәйәтсе асылды **7.** *разг.* (*в карточных играх*) баҫып бөтөрөү, баҫыу

**РАСКУДА́ХТАТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* ҡыҫҡылдай башлау, бик ныҡ (оҙаҡ) ҡыҫҡылдау; **ку́ры раскуда́хтались** тауыҡтар ҡыҫҡылдай башланы **2.** *прост.* (*разворчаться*) (урынһыҙ) ҡысҡырына (екеренә) башлау, мыжып һөйләнеү

**РАСКУЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **раскула́чить**

**РАСКУЛА́ЧИТЬ** *сов. кого-что* кулакты юҡҡа сығарыу (бөтөрөү)

**РАСКУПА́ТЬ** *несов. см.* **раскупи́ть**

**РАСКУПА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **раскупа́ть**

**РАСКУПИ́ТЬ** *сов. что* һатып алып бөтөрөү; **раскупи́ть биле́ты в теа́тр** театрға билеттарҙы һатып алып бөтөрөү

**РАСКУ́ПОРИВАТЬ** *несов. см.* **раску́порить**

**РАСКУ́ПОРИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раску́пориться 2.** *страд. от* **раску́поривать**

**РАСКУ́ПОРИТЬ** *сов. что* асыу, тығынын (бөкөһөн) алыу; **раску́порить буты́лку** шешә асыу

**РАСКУ́ПОРИТЬСЯ** *сов.* тығыны (бөкөһө) асылыу, тығыны алыныу; **бо́чка раску́порилась** мискәнең тығыны алынған

**РАСКУ́РИВАТЬ** *несов. что* **1.** *см.* **раскури́ть 2.** *без доп.*; *разг.* (тәмәке) төтәтеп ултырыу, (тәмәке) тартып ваҡыт үткәреү

**РАСКУ́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раскури́ться** 1; **2.** *страд. от* **раску́ривать**

**РАСКУРИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡабыҙыу, тоҡандырыу, тоҡандырып ебәреү (*папиросы, тәмәкене һ.б.*); **раскури́ть тру́бку** төрөпкә ҡабыҙыу **2.** *прост.* тартып бөтөрөү; **раскури́ть весь таба́к** бөтә тәмәкене тартып бөтөрөү

**РАСКУРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тоҡаныу, ҡабыныу; **тру́бка хорошо́ раскури́лась** төрөпкә яҡшы ҡабынды **2.** *прост.* (*начать курить всё больше*) күп тарта башлау

**РАСКУСИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тешләп ватыу (ярыу); **раскуси́ть оре́х** сәтләүекте тешләп ватыу **2.** *кого-что*; *перен., разг.* аңлау, төшөнөү, аңлап (белеп) алыу; **раскуси́ть наме́рения** *чьи-л.* *кемдеңдер* ниәтен төшөнөү

**РАСКУСТИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡыуаҡланыу, ботаҡланыу, ялбырап үҫеп китеү; **кле́вер раскусти́лся** туҡранбаш ялбырап үҫеп китте; **черёмуха раскусти́лась** муйыл ҡыуаҡланды

**РАСКУ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **раскуси́ть** 1

**РАСКУ́СЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **раску́сывать**

**РАСКУ́ТАТЬ** *сов. кого-что* урауын асыу, төргәген сисеү, тағатыу, сисеп (асып) ташлау, сисендереү; **раску́тать ребёнка** баланың урауын сисеү; **раску́тать шаль** шәлде сисеү

**РАСКУ́ТАТЬСЯ** *сов.* асылыу, сиселеү, тағатылыу, асылып (сиселеп) китеү, сисенеү, һалыу; **раску́тайся, здесь жа́рко** сисен, бында эҫе

**РАСКУТИ́ТЬСЯ** *сов.* типтереү, (кәйеф-сафаға) бирелеү, (кәйеф-сафа) менән мауығыу

**РАСКУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **раску́тать**

**РАСКУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **раску́таться 2.** *страд. от* **раску́тывать**

**РАСОВЕ́ДЕНИЕ** *с* расоведение (*антропологияның расаларҙы өйрәнеү бүлеге*; *расаларҙы өйрәнеү фәне*)

**РА́СОВЫЙ**, -ая, -ое раса …ы; **ра́совые отли́чия** раса айырымлыҡтары; **ра́совые при́знаки** раса билдәләре

**РАСПА́Д** *м см.* **распа́сться** — **распада́ться**; **белко́вый распа́д** аҡһым тарҡалыуы; **распа́д радиоакти́вных элеме́нтов** радиоактив элементтарҙың тарҡалышы; **распа́д систе́мы** системаның тарҡалыуы

**РАСПАДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **распа́сться**

**РАСПА́ДОК** *м* үҙәк, тар ҡул

**РАСПА́ИВАТЬ** *несов. см.* **распая́ть**

**РАСПА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распая́ться 2.** *страд. от* **распа́ивать**

**РАСПАКОВА́ТЬ** *сов.* (төргәкте) тағатыу (сисеү, һүтеү, асыу); **распакова́ть кни́ги** китаптарҙың төргәген тағатыу; **распакова́ть чемода́н** сумаҙан асыу; **распакова́ть свёрток** төргәкте сисеү

**РАСПАКОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (үҙ әйберҙәрен) сисеп (асып, тағатып) бөтөрөү, сисеү, асыу, тағатыу; **мы распакова́лись** әйберҙәребеҙҙе тағатып бөтөрҙөк **2.** сиселеү, асылыу, сиселеп (асылып) китеү; **кни́ги распакова́лись** китап төргәге сиселеп китте

**РАСПАКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **распакова́ть**

**РАСПАКО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распакова́ться 2.** *страд.* от **распако́вывать**

**РАСПАЛИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* ҡабыҙыу, тоҡандырыу; **распали́ть костёр** усаҡ тоҡандырыу **2.** *что* бик ныҡ ҡыҙҙырыу (эҫетеү, яндырыу); **со́лнце распали́ло ка́мни** ҡояш таштарҙы бик ныҡ ҡыҙҙырҙы **3.** *кого-что*; *перен.* ҡыҙҙырыу, ярһытыу, ҡуҙғытыу; **распали́ть гне́вом** асыу менән ярһытыу **4.** *перен.* ҡабыҙыу, тоҡандырыу; **распали́ть фанта́зию** хыялды тоҡандырыу

**РАСПАЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** ныҡ ҡыҙыу (эҫеү); **печь распали́лась** мейес ныҡ ҡыҙған **2.** *перен.* ҡыҙып (ярһып) китеү, тоҡанып (ҡабынып) китеү; **распали́ться гне́вом** асыуланып ҡыҙып китеү

**РАСПА́ЛУБИТЬ** *сов. что*; *тех.* ҡоршауын алыу (*бетон һалғанда*)

**РАСПАЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **распали́ть**

**РАСПАЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распали́ться 2.** *страд. от* **распаля́ть**

**РАСПА́РИВАТЬ** *несов. см.* **распа́рить**

**РАСПА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распа́риться 2.** *страд. от* **распа́ривать**

**РАСПА́РИТЬ** *сов.* **1.** *что* бешекләү, йомшартыу (*быуға тотоп*); **распа́рить ве́ник** миндек бешекләү **2.** *кого-что*; *разг.* йылытыу, сабынып йомшартыу (*эҫе мунсала, һыуҙа*) **3.** *кого-что*; *разг.* тирләтеү, тиргә батырыу, әлһерәтеү, ныҡ ҡыҙҙырып тирләтеү; **со́лнце распа́рило** ҡояш ныҡ ҡыҙҙырып тирләтте

**РАСПА́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** бешекләнеү, йомшарыу (*быуҙа, ҡайнар һыуҙа*); **ве́ник распа́рился** миндек бешекләнде **2.** *разг.* тирләү, шыбыр тиргә батыу, ҡара тиргә батыу (төшөү); **распа́риться в ба́не** мунсала тирләү; **распа́риться от жары́** эҫелектән шыбыр тиргә батыу

**РАСПА́РКА** *ж*; *спец. см.* **распа́рить** — **распа́ривать** 1, **распа́риться** — **распа́риваться**; **распа́рка ко́жи** тире бешекләү; **распа́рка де́рева** ағасты быуға тотоп йомшартыу

**РАСПА́РЫВАТЬ** *несов. см.* **распоро́ть**

**РАСПА́РЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распоро́ться 2.** *страд. от* **распа́рывать**

**РАСПА́СТЬСЯ** *сов.* **1.** таралыу, емерелеү, ишелеү, таралып (емерелеп, ишелеп) төшөү; **ка́мень распа́лся** таш ишелеп төштө; **цепь распа́лась** сылбыр таралып төштө **2.** (*разложиться на составные части*) тарҡалыу, айырылыу, бүленеү; **моле́кула распа́лась на а́томы** молекула атомдарға тарҡалды **3.** *перен.* тарҡалыу; **кружо́к распа́лся** түңәрәк тарҡалды **4.** *перен.* (*разладиться*) боҙолоу, бүленеү, өҙөлөү; **бесе́да распа́лась** әңгәмә өҙөлдө; **дру́жба распа́лась** дуҫлыҡ боҙолдо

**РАСПАХА́ТЬ** *сов. что* һөрөү, һөрөп сығыу; **распаха́ть сад** баҡсаны һөрөү

**РАСПА́ХИВАТЬ I** *несов. см.* **распаха́ть**

**РАСПА́ХИВАТЬ II** *несов. см.* **распахну́ть**

**РАСПА́ХИВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **распа́хивать** I

**РАСПА́ХИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **распахну́ться 2.** *страд. от* **распа́хивать** II

**РАСПАХНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** шар асыу, асып ебәреү (ҡуйыу); **распахну́ть дверь** ишекте шар асыу; **распахну́ть воро́та** ҡапҡаны шар асып ҡуйыу **2.** (*откинуть полы одежды*) асып ебәреү, ысҡындырып ебәреү; **распахну́л сюрту́к** сюртуктың иҙеүен асып ебәрҙе

**РАСПАХНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** шар асылыу (асылып китеү); **окно́ распахну́лось** тәҙрә шар асылып китте **2.** киң асылыу, асылып китеү; **распахну́лся пиджа́к** пинжәк асылып китте

**РАСПАШНО́Й I,** -ая, -ое һөрөлгән, һөрөлә торған, һөрөүгә тәғәйенләнгән; **распашна́я земля́** һөрөүгә тәғәйенләнгән ер

**РАСПАШНО́Й II,** -ая, -ое **1.** елбәгәй, төймәһеҙ; **распашна́я ко́фта** төймәһеҙ кофта; **распашна́я шу́ба** елбәгәй тун **2.** *спец.* ике яҡҡа асылмалы, ике яҡҡа асыла торған; **распашны́е воро́та** ике яҡҡа асылмалы ҡапҡа ♦ **распашно́е весло́** ике ҡалаҡлы ишкәк

**РАСПАШО́НКА** *ж*; *разг.* бәпес күлдәге

**РАСПАЯ́ТЬ** *сов. что* иретеү; **распая́ть самова́р** самауырҙы иретеү

**РАСПАЯ́ТЬСЯ** *сов.* иреү, иреп сығыу, ысҡыныу (*йәбештергән еренән*); **ча́йник распая́лся** сәйнүк иреп сыҡҡан

**РАСПЕ́В** *м* һуҙып (көйләп) әйтеү (һөйләү); **говори́ть с распе́вом** һуҙып һөйләү

**РАСПЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **распе́ть 2.** *что* и *без доп.*; *разг.* йырлап йөрөү, көйләү, йырлау, һайрау; **распева́ть пе́сни** йырҙар йырлау

**РАСПЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распе́ться** 2; **2.** *страд. от* **распева́ть**

**РАСПЕКА́ТЬ** *несов. см.* **распе́чь**

**РАСПЕЛЕНА́ТЬ** *сов. кого* биләүҙән алыу, биләүен сисеү; **распелена́ть ребёнка** баланың биләүен сисеү

**РАСПЕЛЕНА́ТЬСЯ** *сов.* биләүе сиселеү, биләүҙән алыныу; **малы́ш распелена́лся** сабый биләүҙән сиселгән

**РАСПЕЛЁНЫВАТЬ** *несов. см.* **распелена́ть**

**РАСПЕРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *разг.* тибеү, эстән этеп ярыу; **льдом распёрло бо́чку** боҙ мискәне типкән **2.** *прост.*, *груб.* (*об ожирении, появившемся у кого-л.*) артыҡ йыуанайыу, йәйелеү

**РАСПЕТУШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* әтәсләнеү, ҡыҙып китеү

**РАСПЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** *муз.* йырлау, йырлап сығыу (ҡарау); **распе́ть дуэ́т** икәүләп йырлау;

**распе́ть хо́ром пе́сню** йырҙы хор менән йырлап сығыу **2.** *разг.* (тауышты) асыу, яҡшыртыу; **распе́ть го́лос** тауышты асыу

**РАСПЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*увлечься пением*) дәртләнеп йырлай башлау, йырға бирелеп китеү, (йырлай-йырлай) ҡыҙып китеү; (*о птицах*) дәртләнеп һайрау, сутылдашыу, сутылдығы сығыу **2.** (йырлай-йырлай) тауыш асылыу, еңел йырлай башлау; **певе́ц распе́лся** йырсының тауышы асылып китте

**РАСПЕЧА́ТАТЬ** *сов. что* **1.** (*открыть что-л.*) мөһөрөн алыу, мөһөрөн алып асыу (инеү); **распеча́тать помеще́ние** бинаның мөһөрөн алып инеү **2.** (*вскрыть что-л. заклеенное*) асыу; **распеча́тать конве́рт** конвертты асыу **3.** *прост.* баҫыу, билдәле итеү, таратыу; **распеча́тать в газе́тах** гәзиттәрҙә баҫыу **4.** (*размножить с помощью печатного устройства*) баҫтырыу

**РАСПЕЧА́ТАТЬСЯ** *сов.* асылыу, асылып китеү, мөһөрө ҡубып асылыу; **письмо́ распеча́талось** хат асылған

**РАСПЕЧА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **распеча́тать**

**РАСПЕЧА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распеча́таться** **2.** *страд. от* **распеча́тывать**

**РАСПЕ́ЧЬ** *сов. кого*; *разг.* ҡаты шелтәләү, ҡыҙҙырыу, әрләү; **распе́чь лени́вого ученика́** ялҡау уҡыусыны ҡыҙҙырыу

**РАСПИВА́ТЬ** *несов. что*; *разг.* **1.** *см.* **распи́ть** **2.** яйлап (иркенләп) эсеү, эсеп ултырыу; **распива́ть чай** сәй эсеп ултырыу

**РАСПИ́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* **1.** (бүлеп) ҡойоу, бүлеп һалыу, ҡойҙороп (һалдырып) эсеү ...ы; **распи́вочная прода́жа вина́** шарапты бүлеп ҡойоп һатыу **2.** *в знач. сущ.* **распи́вочная** *ж*; *разг.*, *уст.* мәйхана, шарапхана

**РАСПИ́Л** *м*; *спец.* **1.** *см.* **распили́ть** — **распи́ливать**; **распи́л бревна́ на до́ски** бүрәнәне таҡтаға бысыу **2.** (*способ распиливания*) бысыу, киҫелеш; **попере́чный распи́л** арҡыры бысыу; **продо́льный распи́л** буй бысыу **3.** (*место разреза*) бысылған урын (ер)

**РАСПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **распили́ть**

**РАСПИ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распили́ться** **2.** *страд. от* **распи́ливать**

**РАСПИЛИ́ТЬ** *сов. что* бысыу, бысып төшөрөү; **распили́ть дрова́** утын бысыу

**РАСПИЛИ́ТЬСЯ** *сов.* бысылыу, бысылып бөтөү; **доска́ распили́лась** таҡта бысылды

**РАСПИ́ЛКА** *ж*; *спец. см.* **распили́ть** — **распи́ливать**; **распи́лка дров** утын бысыу

**РАСПИЛО́ВКА** *ж*; *спец. см.* **распи́лка**; **распило́вка ка́мня** ташты бысыу

**РАСПИЛО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* быса торған, бысыу ...ы; **распило́вочный цех** бысыу цехы

**РАСПИЛО́ВЩИК** *м* бысыусы (*эшсе*); **распило́вщик ка́мня** таш бысыусы

**РАСПИНА́ТЬ I** *несов. см.* **распя́ть**

**РАСПИНА́ТЬ II** *сов. кого-что*; *разг.* (*разбросать пинками*) типкеләү

**РАСПИНА́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** бик күп көс һалыу, көсәнеү, тырышыу, мәшәҡәтләнеү; **распина́ться за подру́гу** әхирәт өсөн тырышыу **2.** *страд. от* **распина́ть** I

**РАСПИРА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** *см.* **распере́ть** **2.** *перен.*, *разг.* (*о желании, чувстве и т.п.*) (күкрәктә) тултырыу, ташыу, күкрәккә һыймау; **тоска́ распира́ет грудь** һағыш күкрәккә һыймай

**РАСПИСА́НИЕ** *с* йәҙүәл, расписание; **соста́вить расписа́ние** йәҙүәл төҙөү; **расписа́ние уро́ков** дәрес йәҙүәле ♦ **шта́тное расписа́ние** *см.* **шта́тный**

**РАСПИСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* яҙып алыу (ҡуйыу); **расписа́ть ро́ли** ролдәрҙе яҙып алыу **2.** *кого-что* бүлеү, (бүлеп) яҙып сығыу; **расписа́ть по графа́м** графаларға бүлеп яҙып сығыу; **расписа́ть свой рабо́чий день** эш көнөңдө бүлеп сығыу **3.** *что, чем* биҙәкләү, биҙәкләп сығыу, биҙәк һалыу (төшөрөү); **расписа́ть сунду́к** һандыҡҡа биҙәктәр төшөрөү; **расписа́ть сте́ны** стеналарҙы биҙәкләү **4.** *кого-что* и *с доп.*; *перен.*, *разг.* (*рассказать, приукрашивая, преувеличивая*) арттырып (матурлап) һөйләү; **расписа́ть происше́ствие** ваҡиғаны арттырып һөйләү

**РАСПИСА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡул ҡуйыу; **расписа́ться в получе́нии зарпла́ты** эш хаҡын алғанға ҡул ҡуйыу **2.** *в чём*; *перен.*, *ирон.* таныу, үҙ өҫтөнә алыу; **расписа́ться в со́бственном неве́жестве** үҙ наҙанлығын таныу **3.** *с кем* и *без доп.*; *разг.* (*зарегистрироваться*) яҙылышыу; **предлага́ть расписа́ться** яҙылышырға тәҡдим итеү **4.** *разг.* (*увлечься писанием*) күп яҙыу, яҙыу менән мауығып китеү

**РАСПИ́СКА** *ж* **1.** *см.* **расписа́ть** — **распи́сывать** 1—3; **распи́ска стен** стеналарҙы биҙәкләү **2.** (*документ*) расписка, алыу ҡағыҙы; **написа́ть распи́ску** расписка яҙыу

**РАСПИСНО́Й,** -ая, -ое *разг.* биҙәкле, биҙәкләнгән, биҙәлгән, рәсемле; **расписна́я дуга́** биҙәкле дуға

**РАСПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **расписа́ть**

**РАСПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расписа́ться** 1—3; **2.** *страд. от* **распи́сывать**

**РАСПИ́ТИЕ** *с*; *разг. см.* **распи́ть**; **распи́тие ча́я** (бергәләп) сәй эсеү

**РАСПИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* (бергәләп) эсеү, эсеп бөтөрөү, бөткәнсе эсеү; **распи́ть буты́лку вина́** бер шешә шарапты эсеп бөтөрөү

**РАСПИХА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** этеп-төртөп юл ярыу, йырып үтеү; **распиха́ть толпу́** төркөмдө йырып үтеү **2.** тығып бөтөрөү, тыҡҡылау; **распиха́ть всё по карма́нам** бөтәһен дә кеҫәгә тығып бөтөрөү; **распиха́ть ве́щи по угла́м** әйберҙәрҙе мөйөштәргә тыҡҡылау

**РАСПИ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **распиха́ть**

**РАСПИ́ХНУТЬ** *сов. см.* **распиха́ть**

**РАСПЛА́ВИТЬ** *сов. что* иретеү; **распла́вить свине́ц** ҡурғаш иретеү

**РАСПЛА́ВИТЬСЯ** *сов.* иреү; **о́лово распла́вится на огне́** аҡ ҡурғаш утта ирей

**РАСПЛА́ВКА** *ж; спец. см.* **распла́вить** — **расплавля́ть**, **распла́виться** — **расплавля́ться**; **распла́вка мета́лла** металл иретеү

**РАСПЛАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **распла́вить**

**РАСПЛАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распла́виться 2.** *страд. от* **расплавля́ть**

**РАСПЛА́КАТЬСЯ** *сов.* (ҡапыл) илап ебәреү, бик ныҡ илай башлау; **распла́каться от доса́ды** ғәрлектән илап ебәреү

**РАСПЛАНИ́РОВАТЬ** и **РАСПЛАНИРОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** планлаштырыу, планлаштырып сығыу; **распланирова́ть рабо́ту на ме́сяц** бер айға эште планлаштырып сығыу **2.** (*разместить, распределить по плану*) план буйынса урынлаштырыу, план буйынса билдәләү, план төҙөү; **распланирова́ть сад** баҡсаның планын төҙөү

**РАСПЛАНИРО́ВКА** *ж см.* **распланирова́ть** — **распланиро́вывать** 2; **распланиро́вка помеще́ний заво́да** завод биналарын план буйынса урынлаштырыу; **распланиро́вка па́рка** парктың планын төҙөү

**РАСПЛАНИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **распланирова́ть**

**РАСПЛАСТА́ТЬ** *сов.* **1.** *что; спец.* телгеләү, ярғылау, буйға киҫеү (ярыу); **распласта́ть ры́бу** балыҡты буйға ярғылау **2.** *что* сүкеп (ҡыҫып) киңәйтеү (йәйеү), ялпайтыу; **распласта́ть желе́зо** тимерҙе сүкеп йәйеү **3.** *кого-что* (ергә) лыпын һалыу (ятҡырыу); **распласта́ть проти́вника на земле́** дошманды ергә лыпын һалыу **4.** *что* йәйеү, киреү; **распласта́ть кры́лья** ҡанаттарҙы киреү

**РАСПЛАСТА́ТЬСЯ** *сов.* лыпын (йәйелеп, һуҙылып) ятыу, ергә ятыу, ҡолау; **распласта́ться на земле́** ергә һуҙылып ятыу

**РАСПЛА́СТЫВАТЬ** *несов. см.* **распласта́ть**

**РАСПЛА́СТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распласта́ться 2.** *страд. от* **распла́стывать**

**РАСПЛА́ТА** *ж* **1.** *см.* **расплати́ться** — **распла́чиваться** 1, 2; **распла́та за убы́ток** зыянды түләү **2.** *перен.* яза биреү, үс алыу; **наступи́л час распла́ты** үс алыу сәғәте етте; **распла́та за преступле́ние** эшләгән енәйәт өсөн яза

**РАСПЛАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *с кем* и *без доп.* тулыһынса түләү, түләп бөтөрөү; **расплати́ться с долга́ми** бурыстарҙы тулыһынса түләп бөтөрөү **2.** *перен., разг.* иҫәпләшеү, үс алыу (ҡайтарыу); **расплати́ться с изме́нниками** һатлыҡ йәндәр менән иҫәпләшеү **3.** *за что; перен.* (*понести наказание*) яза алыу, язаға дусар булыу, яуап биреү; **ма́льчик расплати́лся за ша́лость** малай шаянлығы өсөн язаһын алды

**РАСПЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. см.* **расплати́ться**

**РАСПЛЕСКА́ТЬ** *сов. что* сайпылдырыу, сайпылтыу; **расплеска́ть во́ду из ведра́** күнәктәге һыуҙы сайпылдырыу

**РАСПЛЕСКА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** сайпылыу, сайпылып түгелеү; **вода́ расплеска́лась** һыу сайпылып түгелде **2.** *разг.* (*начать плескаться всё сильнее*) һыу һибешә башлау, һыу сәсрәтешеү

**РАСПЛЁСКИВАТЬ** *несов. см.* **расплеска́ть**, **расплесну́ть**

**РАСПЛЁСКИВАТЬСЯ** *несов. см.* **расплеска́ться** 1; **2.** *страд. от* **расплёскивать**

**РАСПЛЕСНУ́ТЬ** *сов. см.* **расплеска́ть**

**РАСПЛЕСНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **расплеска́ться**

**РАСПЛЕСТИ́** *сов. что* һүтеү, тағатыу; **расплести́ ко́су** сәсте тағатыу; **расплести́ верёвку** бауҙы һүтеү

**РАСПЛЕСТИ́СЬ** *сов.* һүтелеү, тағатылыу, һүтелеп (тағатылып) китеү; **ко́сы расплели́сь** сәс толомдары тағатылған

**РАСПЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **расплести́**

**РАСПЛЕТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расплести́сь 2.** *страд. от* **расплета́ть**

**РАСПЛО́Д** *м; спец.* үрсем; **распло́д пчёл** бал ҡорто үрсеме; **оста́вить на распло́д** үрсемгә ҡалдырыу

**РАСПЛОДИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*размножить, развести в большом количестве*) үрсетеү; **расплоди́ть скоти́ну** мал үрсетеү **2.** *разг.* (*произвести на свет многочисленное потомство*) үрсетеү, донъяға килтереү, ишәйтеү; **расплоди́ть семе́йство** ғаилә ишәйтеү

**РАСПЛОДИ́ТЬСЯ** *сов.* үрсеү, ишәйеү, күбәйеп (артып) китеү; **кро́лики расплоди́лись** йорт ҡуяндары күбәйеп китте

**РАСПЛЫВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **расплы́ться**

**РАСПЛЫ́ВЧАТОСТЬ** *ж* тоноҡлоҡ, һүрәнкелек, бөләңгертлек, асыҡ булмау, аңлайышһыҙлыҡ, бәйләнешһеҙлек; **расплы́вчатость очерта́ний** һыҙатланыштың тоноҡлоғо; **расплы́вчатость мы́сли** фекерҙең асыҡ булмауы

**РАСПЛЫ́ВЧАТЫЙ**, -ая, -ое **1.** тоноҡ, һүрәнке, бөләңгерт; **расплы́вчатый ого́нь костра́** усаҡтың һүрәнке уты; **расплы́вчатые очерта́ния гор** тауҙарҙың тоноҡ һыҙатланышы **2.** *перен.* (*недостаточно точно выраженный*) тарҡау, аңлайышһыҙ, бәйләнешһеҙ; **расплы́вчатые представле́ния** бәйләнешһеҙ күҙаллауҙар; **расплы́вчатый отве́т** аңлайышһыҙ яуап

**РАСПЛЫ́ВШИЙСЯ**, -аяся, -ееся **1.** *прич. от* **расплы́ться 2.** *прил.; разг.* (артыҡ) йәйелгән, ҡалынайған, йыуан, һимеҙ, лырҡыш; **расплы́вшаяся же́нщина** артыҡ йыуан ҡатын

**РАСПЛЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*растечься*) йәйелеү, йәйелеп китеү; **черни́ла расплыли́сь по бума́ге** ҡара ҡағыҙға йәйелде **2.** (*распространиться — о дыме, тумане и т.п.*) таралыу, йәйелеү, таралып китеү; **таба́чный дым расплы́лся по ко́мна-**

**те** тәмәке төтөнө бүлмәгә таралды **3.** (*размыться*) юйылыу (*һыуҙан йәки башҡа шыйыҡлыҡтан*); **бу́квы расплыли́сь на бума́ге** ҡағыҙҙағы хәрефтәр юйылған **4.** *перен.* асыҡ күренмәү, күренмәй башлау, бөләңгертләнеү; **фигу́ры люде́й расплы́лись в су́мраке** кеше һындары ҡараңғыла күренмәй башланы **5.** (*располнеть*) *перен., разг.* йыуанайыу, арҡырыға йәйелеү, лапшайыу **6.** (*уплыть в разные стороны*) таралышыу, төрлө яҡҡа йөҙөп китеү (таралышыу); **у́тки расплыли́сь по о́зеру** өйрәктәр күл буйлап төрлө яҡҡа таралышты

**РАСПЛЮ́СНУТЬ** *сов.*; *разг. см.* **расплю́щить**

**РАСПЛЮ́СНУТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **расплю́щиться**

**РАСПЛЮ́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **расплю́щить**

**РАСПЛЮ́ЩИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расплю́щиться 2.** *страд. от* **расплю́щивать**

**РАСПЛЮ́ЩИТЬ** *сов. что* **1.** ялпайтыу, йәмшәйтеү; **расплю́щить шля́пку гвоздя́** ҡаҙауҙың эшләпәһен ялпайтыу **2.** (*сильным ударом, давлением смять*) һытыу, иҙеү, ялпайтыу; **расплю́щить одни́м уда́ром** бер һуғыуҙа ялпайтыу

**РАСПЛЮ́ЩИТЬСЯ** *сов.* ялпайыу, йәмшәйеү, һытылыу, иҙелеү; **гвоздь расплю́щился** ҡаҙаҡ ялпайған

**РАСПЛЯСА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шашып (ҡотороп) бейеү; **танцо́р расплясáлся** бейеүсе шашып бейене

**РАСПОДОБЛЕ́НИЕ** *с*; *лингв.* оҡшашмау; **расподобле́ние зву́ков** өндәрҙең оҡшашмауы

**РАСПОЗНАВА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **распознава́ть 2.** *прил.* белеп (танып) була торған, асыҡларға мөмкин булған; **распознава́емые при́знаки** асыҡларға мөмкин булған билдәләр; **распознава́емый го́лос** танып була торған тауыш

**РАСПОЗНАВА́ТЬ** *несов. см.* **распозна́ть**

**РАСПОЗНАВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **распознава́ть**

**РАСПОЗНА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*определить по каким-л. признакам*) белеү, таныу, асыҡлау, айырыу, билдәләү; **распозна́ть птиц** ҡоштарҙы таныу **2.** (*разведать*) белеү, һиҙеү; белеп (һиҙеп) алыу; **распозна́ть чужи́е наме́рения** сит кешенең ниәттәрен һиҙеп алыу

**РАСПОЛАГА́ТЬ I** *несов. см.* **расположи́ть**

**РАСПОЛАГА́ТЬ II** *несов.* **1.** *чем* булыу, эйә (ҡулда) булыу; **располага́ть фа́ктами** мәғлүмәттәргә эйә булыу; **располага́ть свобо́дным вре́менем** буш ваҡыт булыу **2.** *кем-чем* (*распоряжаться*) үҙе теләгәнсә эш итеү (файҙаланыу); **располага́ть вре́менем по со́бственному усмотре́нию** ваҡытты үҙе теләгәнсә файҙаланыу; **располага́ть больши́ми сре́дствами** ҙур аҡсалар менән эш итеү **3.** *к чему* (*способствовать чему-л.*) ярҙам итеү, сәбәпсе булыу, булышыу, килтереү; **све́жий во́здух располага́ет ко сну** саф һауа йоҡо килтерә **4.** *с неопр.*; *уст.* (*намереваться*) ниәт итеү, -ға/-гә уйлау, -маҡсы/-мәксе булыу; **располага́ть пое́хать в го́род** ҡалаға китергә уйлау

**РАСПОЛАГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расположи́ться 2.** *страд. от* **располага́ть** I

**РАСПОЛАГА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **располага́ть** I; **2.** *прил.* яғымлы, һөйкөмлө, мөләйем, үҙенә йәлеп итеп (тартып, ылыҡтырып) торған; **располага́ющая речь** яғымлы телмәр

**РАСПО́ЛЗАТЬСЯ** *сов.* шыуыша башлау, шыуышырға тотоноу

**РАСПОЛЗА́ТЬСЯ** *несов. см.* **расползти́сь**

**РАСПОЛЗТИ́СЬ** *сов.* **1.** таралышыу, шыуышып китеп бөтөү, таралып китеү; **тарака́ны расползли́сь** тараҡандар таралып китте **2.** (*распространиться, стелясь*) таралыу, йәйелеү; **ту́чи расползли́сь** болоттар таралды **3.** *перен., разг.* (*медленно, постепенно разойтись*) яйлап (төрлө яҡҡа) таралышыу; **расползли́сь по дома́м** өйҙәренә яйлап таралыштылар **4.** *разг.* (*расплыться*) йәйелеү, йәйелеп китеү; **черни́ла расползли́сь** ҡара йәйелде **5.** *разг.* (*утратить отчётливые очертания*) боҙолоу, йыуылыу, юйылыу; **колеи́ на доро́гах расползли́сь от дождя́** ямғырҙан юлдарҙағы тәгәрмәс эҙҙәре йыуылды; **печа́ть расползла́сь** мисәт юйылды **6.** *перен., прост.* (*располнеть*) йәйелеү, ҡалынайыу, йыуанайыу **7.** *разг.* туҙыу, тетелеү, ылйырау; **подкла́дка расползла́сь** эслеге тетелгән

**РАСПОЛНЕ́ТЬ** *сов.* йыуанайып (ҡалынайып, йәйелеп) китеү; **си́льно располне́ть** артыҡ йыуанайып китеү

**РАСПОЛОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **расположи́ть** 1, **расположи́ться**; **расположе́ние дета́лей** деталдәрҙең ҡуйылышы **2.** урын, торған (урынлашҡан) ер (урын); **расположе́ние врага́** дошман торған ер **3.** (*порядок размещения чего-л.*) урынлашыу тәртибе, урынлаштырылыш, төҙөлөш, тәртип; **расположе́ние ко́мнат** бүлмәләрҙең урынлашыуы **4.** (*симпатия*) яйлашыу, күңел ятыу, яҡшы ҡараш, күңелгә оҡшау; **чу́вствовать расположе́ние к** *кому-л. кемгәлер* күңел ятыу **5.** (*склонность*) ынтылыш, тартылыу, һәүәҫлек, бирешеүсәнлек; **расположе́ние к му́зыке** музыкаға һәүәҫлек; **расположе́ние органи́зма к боле́зням** организмдың ауырыуҙарға бирешеүсәнлеге **6.** *разг.* (*настроение*) кәйеф, теләк; **весёлое расположе́ние** шат кәйеф; **просну́ться в до́бром расположе́нии** изге теләктә уяныу ♦ **расположе́ние ду́ха** күңел ятыу, күңелгә хуш килеү

**РАСПОЛО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **расположи́ть 2.** *к кому*; *прил.* күңелгә оҡшаған (ятҡан), күңелгә яҡын, теләктәш, тартым; **он к вам о́чень располо́жен** һеҙ унның күңеленә бик яҡын **3.** *к чему* и *с неопр.*; *прил.* теләге бар (юҡ), күңеле ятыу (ятмау), бирешеүсән, бирелеүсән; **не располо́жен е́хать** барырға теләге юҡ

**РАСПОЛОЖИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** урынлаштырыу, ҡуйыу, урынлаштырып (теҙеп) ҡуйыу; **расположи́ть ме́бель** мебель урынлаштырыу; **расположи́ть слова́ по алфави́ту** һүҙҙәрҙе алфавит буйынса ҡуйыу **2.** тартыу, ҡаратыу, ылыҡтырыу, йәлеп итеү; **расположи́ть к себе́ но́вых знако́мых** яңы таныштарҙы үҙеңә йәлеп итеү

**РАСПОЛОЖИ́ТЬСЯ** *сов.* урынлашыу, ултырыу; **расположи́ться удо́бно** уңай урынлашыу; **расположи́ться в ваго́не** вагонда урынлашыу

**РАСПОЛОСОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** буй-буй йыртҡылау (телгеләү, ҡырҡҡылау); **располосова́ть жесть** ҡалайҙы буй-буй ҡырҡҡылау; **располосова́ть на куски́** буй-буй өлөштәргә йыртҡылау **2.** (*избить, оставив на теле рубцы, раны в виде полос*) һыҙыра ярыу, һыҙырыу; **располосова́ть кнуто́м** сыбыртҡы менән һыҙырыу

**РАСПО́Р** *м*; **1.** *спец. см.* **распере́ть** 1 — **распира́ть** 1; **2.** *тех.* баҫым көсө (*ҡоролмаларҙа вертикаль таяуҙарҙың горизонталь йүнәлештә баҫым яһауы*)

**РАСПО́РКА** *ж* терәү; **ста́вить распо́рку** терәү ҡуйыу

**РАСПОРО́ТЬ** *сов. что* **1.** (йөй) һүтеү, һүтеп ташлау; **распоро́ть ко́фту** кофта һүтеү; **распоро́ть узо́р** биҙәк һүтеү **2.** йыртыу, йыртып ебәреү; **распоро́ть ко́жу** тире йыртыу **3.** *перен.*, *разг.* (*внезапно и резко нарушить тишину*) ярыу, ярып ебәреү; **вы́стрел распоро́л тишину́** атыу тауышы тынлыҡты ярҙы

**РАСПОРО́ТЬСЯ** *сов.* һүтелеү; **рука́в распоро́лся** еӊ һүтелгән

**РАСПО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* терәү ...ы; **распо́рочный брус** терәү бурсаһы

**РАСПОРЯДИ́ТЕЛЬ** *м* и **РАСПОРЯДИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* башлыҡ, (яуаплы) етәксе, ойоштороусы, алып барыусы; **распоряди́тель креди́тов** кредиттар буйынса етәксе

**РАСПОРЯДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ойоштороу (етәкселек итеү) оҫталығы; **распоряди́тельность команди́ра** командирҙың ойоштороу оҫталығы

**РАСПОРЯДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое яҡшы етәкселек итә (ойоштора) белеүсе; **распоряди́тельный нача́льник** яҡшы етәкселек итә белеүсе хужа

**РАСПОРЯДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *о чём* бойороу, ҡушыу, әмер (бойороҡ) биреү; **распоряди́ться об отъе́зде** ҡуҙғалыу тураһында бойороҡ биреү **2.** *чем* етәкселек итеү, ойоштороу, шөғөлләнеү, идара итеү; **распоряди́ться ве́чером** кисә ойоштороу **3.** *кем-чем* (*употребить, найти применение*) тотоноу, ҡулланыу, файҙаланыу, эш итеү; **распоряди́ться свои́м состоя́нием** үҙ мөлкәте менән эш итеү

**РАСПОРЯ́ДОК** *м* тәртип; **распоря́док дня** көн тәртибе; **пра́вила вну́треннего распоря́дка** эске тәртип ҡағиҙәләре

**РАСПОРЯЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распоряди́ться 2.** *чем* и *без доп.* (*управлять*) эш алып барыу, идара итеү, етәкселек итеү, ойоштороу

**РАСПОРЯЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **распоряди́ться** — **распоряжа́ться**; **распоряже́ние деньга́ми** аҡса менән эш итеү **2.** (*приказание*) бойороҡ, күрһәтмә, әмер; **официа́льное распоряже́ние** рәсми күрһәтмә; **распоряже́ния по хозя́йству** хужалыҡ буйынса күрһәтмәләр ♦ **в распоряже́ние** *кого-чего кем-нимә* ҡарамағына; **в распоряже́нии** *кого-чего кем-нимә* ҡарамағында

**РАСПОЯ́САТЬ** *сов. кого-что* билбауын сисеү (сисеп алыу); **распоя́сать ребёнка** баланың билбауын сисеү; **распоя́сать пла́тье** күлдәктең билбауын сисеп алыу

**РАСПОЯ́САТЬСЯ** *сов.* **1.** билбауҙы сисеү (сисеп алыу); **распоя́саться и сесть за стол** билбауҙы сисеү һәм өҫтәл артына ултырыу **2.** *перен., разг.* (*утратить сдержанность*) йүгәнһеҙләнеү, тыйнаҡһыҙланыу, ҡотороу, сығырынан сығыу; **де́ти распоя́сались** балалар ҡоторҙо

**РАСПОЯ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **распоя́сать**

**РАСПОЯ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распоя́саться 2.** *страд. от* **распоя́сывать**

**РАСПРА́ВА** *ж* яза, язалау, үс алыу; **зве́рская распра́ва** йыртҡыстарса яза; **учини́ть распра́ву** яза биреү

**РАСПРА́ВИТЬ** *сов. что*; *в разн. знач.* төҙәйтеү, турайтыу, тигеҙләү, яҙыу; **распра́вить про́волоку** сымды төҙәйтеү; **распра́вить скла́дки ю́бки** итәк бөрмәләрен тигеҙләү; **распра́вить морщи́ны** йыйырсыҡтарҙы яҙыу; **распра́вить кры́лья** ҡанат йәйеү ♦ **распра́вить кры́лья** *см.* **крыло́**

**РАСПРА́ВИТЬСЯ I** *сов.*; *в разн. знач.* турайыу, төҙәйеү, яҙылыу, тигеҙләнеү, йәйелеү; **кры́лья распра́вились** ҡанаттар йәйелде; **морщи́ны на лбу распра́вились** маңлайҙағы йыйырсыҡтар яҙылды; **скла́дки распра́вились** бөрмәләр тигеҙләнде

**РАСПРА́ВИТЬСЯ II** *сов.* **1.** *с кем-чем* яза биреү, үс алыу, кәрәген биреү, иҫәпләшеү; **распра́виться с преда́телями** хыянатсыларға яза биреү; **распра́виться с оби́дчиками** рәнйетеүселәр менән иҫәпләшеү **2.** *перен.*, *разг.* (*съесть всё*) ашап бөтөү, теүәлләү, йыпырыу, йыпыртыу; **распра́виться с арбу́зом** ҡарбузды йыпырыу

**РАСПРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **распра́вить**

**РАСПРАВЛЯ́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **распра́виться** I; **2.** *страд. от* **расправля́ть**

**РАСПРАВЛЯ́ТЬСЯ II** *несов. см.* **распра́виться** II

**РАСПРЕДЕЛЕ́НИЕ** *с см.* **распредели́ть** — **распределя́ть**, **распредели́ться** — **распределя́ться**; **распределе́ние дохо́дов** килемдәрҙе бүлеү; **распределе́ние рабо́ты ме́жду сотру́дниками** хеҙмәткәрҙәргә эш бүлеү

**РАСПРЕДЕЛИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** бүлеүсе, бүлеп тороусы, өлөшсө, таратыусы **2.** *тех.* бүлгес (*машиналарҙа, двигателдәрҙә газ, пар һ.б. бүлеүсе ҡорамал*)

**РАСПРЕДЕЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бүлгес, тараҡтыс; **распредели́тельный вал** бүлгес вал; **распредели́тельный механи́зм** бүлгес механизм **2.** бүлеү ...ы, таратыу ...ы; **распредели́тельный пункт** бүлеү пункты

**РАСПРЕДЕЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*разделить между кем-чем-л.*) бүлеү, өләшеү, бүлеп (өләшеп) биреү, таратыу; **распредели́ть дохо́д** табыш бүлеү **2.** *кого-что* (*определить каждого куда-л.*) урынлаштырыу, билдәләү, айырыу, төркөмләү, айырып (төркөмләп) сығыу; **распредели́ть рабо́чих по уча́сткам** эшселәрҙе участкаларға билдәләү; **распредели́ть дете́й по кла́ссам** балаларҙы кластарға бүлеү; **распредели́ть со́бранный материа́л** йыйылған материалды төркөмләү

**РАСПРЕДЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* бүленеү, айырылыу, бүленешеү; **де́ти распредели́лись по гру́ппам** балалар төркөмдәргә бүленде; **обя́занности распредели́лись** вазифалар бүленде

**РАСПРЕДЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **распредели́ть**

**РАСПРЕДЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распредели́ться 2.** *страд. от* **распределя́ть**

**РАСПРОДАВА́ТЬ** *несов. см.* **распрода́ть**

**РАСПРОДАВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **распродава́ть**

**РАСПРОДА́ЖА** *ж см.* **распрода́ть** — **распродава́ть**; **распрода́жа това́ров** тауарҙарҙы арзанға һатыу; **распрода́жа иму́щества** мөлкәтте һата һалып бөтөрөү

**РАСПРОДА́ТЬ** *сов. кого-что* һатыу, һатып бөтөрөү, һата һалып бөтөрөү; **биле́ты распрода́ли** билеттарҙы һата һалып бөтөргәндәр; **распрода́ть по частя́м** өлөшләп һатып бөтөрөү

**РАСПРОПАГАНДИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* (*пропагандируя что-л., убедить в этом кого-л.*); *разг.* өгөтләп ышандырыу (күндереү); **распропаганди́ровать наро́д** халыҡты өгөтләп күндереү

**РАСПРОСТЕРЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** йәйеү, йәйеп ебәреү; **распростере́ть кры́лья** ҡанаттарҙы йәйеп ебәреү **2.** *на кого-что* (*охватить своим действием*) көсәйтеү, киңәйтеү, йәйелдереү; **распростере́ть своё влия́ние** үҙ йоғонтоңдо көсәйтеү

**РАСПРОСТЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һуҙылыу, һуҙылып (йәйелеп) ятыу; **ра́неный распростёрся на земле́** яралы ергә һуҙылып ятты **2.** (*раскинуться*) йәйрәү, йәйрәп ятыу; **пе́ред на́ми распростёрлась степь** беҙҙең алда дала йәйрәп ята ине **3.** *на кого-что*; *перен.* (*распространиться*) йәйелеү, таралыу, солғау

**РАСПРОСТЁРТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **распростере́ть 2.** *прил.* таралған, (киң) йәйелгән; **распростёртые объя́тия** йәйелгән ҡосаҡ

♦ **приня́ть (встре́тить) с распростёртыми объя́тиями** *кого* ҡолас йәйеп ҡаршы алыу

**РАСПРОСТИРА́ТЬ** *несов. см.* **распростере́ть**

**РАСПРОСТИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распростере́ться 2.** *страд. от* **распростира́ть**

**РАСПРОСТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *с кем-чем* һаубуллашыу, хушлашыу; **распрости́ться с друзья́ми** дуҫтар менән һаубуллашыу **2.** *с чем* бәхилләшеү, яҙыу, хушлашыу; **распрости́ться с бе́лым све́том** яҡты донъя менән бәхилләшеү

**РАСПРОСТРАНЕ́НИЕ** *с см.* **распространи́ть** — **распространя́ть**, **распространи́ться** — **распространя́ться**; **распростране́ние о́пыта** тәжрибә таратыу; **распростране́ние радиово́лн** радиотулҡындар таралыуы

**РАСПРОСТРАНЁННОСТЬ** *ж* киң таралғанлыҡ, йыш осрау; **распространённость суеве́рий** хөрәфәттең киң таралғанлығы

**РАСПРОСТРАНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **распространи́ть 2.** *прил.* киң таралған, йыш осрай торған; **распространённое мне́ние** киң таралған фекер ♦ **распространённое предложе́ние** *грам.* тарҡау һөйләм

**РАСПРОСТРАНИ́ТЕЛЬ** *м* и **РАСПРОСТРАНИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* таратыусы; **распространи́тели печа́ти** матбуғат таратыусылар; **распространи́тели ло́жных слу́хов** ялған хәбәр таратыусылар

**РАСПРОСТРАНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое киңәйтелгән, тарҡау; **распространи́тельное толкова́ние те́кста** тексттың тарҡау аңлатмаһы

**РАСПРОСТРАНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** киңәйтеү, йәйелдереү; **распространи́ть свои́ владе́ния** үҙ биләмәләреңде киңәйтеү; **распространи́ть своё влия́ние** үҙ йоғонтоңдо йәйелдереү **2.** таратыу; **распространи́ть зна́ния** аң-белем таратыу; **распространи́ть о́пыт передовико́в** алдынғыларҙың тәжрибәһен таратыу; **распространи́ть слух** һүҙ таратыу **3.** аңҡытыу, сығарыу, таратыу, борҡотоу; **распространи́ть за́пах духо́в** хушбуй еҫтәре аңҡытыу **4.** һатыу, өләшеү, таратыу; **распространи́ть воззва́ние** өндәмә таратыу; **распространи́ть газе́ту** гәзит таратыу; **распространи́ть журна́лы** журналдар һатыу

**РАСПРОСТРАНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йәйелеү; **леса́ распространи́лись далеко́ на се́вер** урмандар төньяҡҡа табан алыҫ йәйелгән **2.** таралыу, киңәйеү; **распространи́лась сла́ва** дан таралды **3.** аңҡыу, сығыу, борҡоу, таралыу; **за́пах цвето́в распространи́лся по ко́мнате** сәскә еҫе бүлмәгә таралды **4.** *разг.* (*пространно рассказать о ком-чём-л.*) бик оҙаҡ (ентекләп, күп) һөйләү; **распространи́ться о свои́х дела́х** эшең тураһында күп һөйләү

**РАСПРОСТРАНЯ́ТЬ** *несов. см.* **распространи́ть**

**РАСПРОСТРАНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распространи́ться 2.** *страд. от* **распространя́ть**



10 зак. 2.0007.06

**РАСПРОЩА́ТЬСЯ** *сов. см.* **распрости́ться**

**РАСПРЫ́СКАТЬ** *сов. что*; *разг.* һибеү, һиптереү, сәсрәтеү, һибеп (сәсрәтеп) бөтөрөү; **распры́скать духи́** хушбуйҙы һөртөп бөтөрөү

**РАСПРЫ́СКИВАТЕЛЬ** *м* һиптергес

**РАСПРЫ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **распры́скать**

**РА́СПРЯ** *ж* ыҙғыш, талаш, ғауға, низағ; **межплеменна́я ра́спря** ырыуҙар араһындағы ыҙғыш

**РАСПРЯГА́ТЬ** *несов. см.* **распря́чь**

**РАСПРЯГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распря́чься** **2.** *страд. от* **распряга́ть**

**РАСПРЯМИ́ТЬ** *сов. кого-что* турайтыу, төҙәйтеү, яҙыу; **распрями́ть со́гнутый гвоздь** кәкрәйгән ҡаҙаҡты төҙәйтеү; **распрями́ть спи́ну** арҡаны турайтыу

**РАСПРЯМИ́ТЬСЯ** *сов.* турайыу, төҙәйеү, яҙылыу; **про́волока распрями́лась** тимерсыбыҡ яҙылды

**РАСПРЯМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **распрями́ть**

**РАСПРЯМЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распрями́ться** **2.** *страд. от* **распрямля́ть**

**РАСПРЯ́ЧЬ** *сов. кого* туғарыу, туғарып ҡуйыу; **распря́чь воло́в** үгеҙҙәрҙе туғарыу

**РАСПРЯ́ЧЬСЯ** *сов.* туғарылыу, туғарылып китеү; **ло́шадь распрягла́сь** ат туғарылған

**РАСПУГА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡурҡытыу, ҡурҡытып (таратып) ебәреү; **распуга́ть птиц** ҡоштарҙы ҡурҡытыу; **распуга́ть дете́й** балаларҙы ҡурҡытыу

**РАСПУ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **распуга́ть**

**РАСПУ́ГИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **распу́гивать**

**РАСПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **распусти́ть**

**РАСПУСКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распусти́ться** **2.** *страд. от* **распуска́ть**

**РАСПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* таратыу, ебәреү; **распусти́ть собра́ние** йыйылышты таратыу; **распусти́ть шко́льников на кани́кулы** уҡыусыларҙы каникулға ебәреү **2.** *что* бушатыу, бушағайтыу, ебәрә төшөү, ысҡындырыу; **распусти́ть реме́нь** ҡайышты бушатыу; **распусти́ть во́жжи** дилбегәне бушатыу **3.** *что* йәйеү, киреү, йәйеп (елберләтеп) ебәреү; **распусти́ть знамёна** байраҡтарҙы елберләтеп ебәреү; **распусти́ть па́рус** елкәнде киреү **4.** *что* (*спустить петли, превратив вязанье в нити*) һүтеү, күҙен ебәреү; **распусти́ть чуло́к** ойоҡ һүтеү **5.** *кого-что*; *разг.* (*ослабить дисциплину*) тәртипте бушатыу, ҡаты тотмау, шашындырыу, шаштырыу; **распусти́ть дете́й** балаларҙы шаштырыу **6.** *разг.* таратыу, һөйләү; **распусти́ть спле́тню** ғәйбәт таратыу **7.** *разг.* (*растворить*) иҙеү, иретеү; **распусти́ть кра́ску в воде́** һыуҙа буяу иҙеү ♦ **распусти́ть ню́ни** *разг.* зарланыу, балауыҙ һығыу, күҙ һытыу; **распусти́ть слю́ни** *см.* **слю́ни**; **распусти́ть язы́к** *см.* **язы́к**

**РАСПУСТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** асылыу, япраҡ ярыу, сәскә атыу; **по́чки распусти́лись** бөрө асылған; **сире́нь распусти́лась** сирень сәскә атты **2.** *разг.* бушау, сиселеү, ысҡыныу; **по́яс распусти́лся** билбау сиселгән **3.** һүтелеү, күҙе китеү, һүрелеү; **чулки́ распусти́лись** ойоҡ һүрелгән **4.** (*о волосах*) тағатылыу, һүтелеү, туҙыу; **коса́ распусти́лась** сәс толомо тағатылды **5.** (*потерять выдержку*) йомшарыу, ихтыяр юғалыу **6.** *перен.*, *разг.* тәртипһеҙләнеү, шашыу, тыйнаҡһыҙланыу, аҙыу; **ма́льчики распусти́лись** малайҙар тәртипһеҙләнде **7.** *разг.* (*раствориться в жидкости*) иреү, иҙелеү; **соль распусти́лась в воде́** тоҙ һыуҙа ирене

**РАСПУ́ТАТЬ** *сов.* **1.** *что* сисеү, һүтеү, тағатыу; **распу́тать у́зел** төйөн сисеү **2.** *что*; *перен.* (*сделать понятным*) сисеү, асыҡлау, осона сығыу, хәл итеү; **распу́тать сло́жный вопро́с** ҡатмарлы мәсьәләне хәл итеү **3.** *кого-что* (*освободить от пут*) тышауын сисеү (һалдырыу); **распу́тать ло́шадь** аттың тышауын сисеү

**РАСПУ́ТАТЬСЯ** *сов.* **1.** сиселеү, ысҡыныу, һүтелеү; **у́зел распу́тался** төйөн сиселде **2.** *перен.*, *разг.* асыҡланыу, сиселеү, аныҡланыу, хәл ителеү; **де́ло распу́талось** эш асыҡланды **3.** *с кем-чем* и *без доп.*; *перен.*, *разг.* ҡотолоу, арыныу, бушаныу, йырып сығыу; **распу́таться с долга́ми** бурыстарҙан ҡотолоу **4.** (*освободиться от пут*) тышауы ысҡыныу (сиселеү); **ло́шадь распу́талась** аттың тышауы ысҡынған

**РАСПУ́ТИЦА** *ж* өҙәрем, юл өҙөклөгө, алашапран; **весе́нняя распу́тица** яҙғы юл өҙөклөгө; **вы́ехать в распу́тицу** өҙәремдә юлға сығыу

**РАСПУ́ТНИК** *м* и **РАСПУ́ТНИЦА** *ж* аҙғын (фәхеш, боҙоҡ) кеше, уйнашсы

**РАСПУ́ТНИЧАТЬ** *несов.* аҙыу

**РАСПУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое аҙғын, боҙоҡ, фәхеш; **распу́тный челове́к** аҙғын кеше; **распу́тное поведе́ние** боҙоҡ ҡылыҡ

**РАСПУ́ТСТВО** *с* аҙғынлыҡ, боҙоҡлоҡ, фәхешлек; **предава́ться распу́тству** аҙғынлыҡҡа бирелеү

**РАСПУ́ТСТВОВАТЬ** *несов. см.* **распу́тничать**

**РАСПУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **распу́тать**

**РАСПУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распу́таться** **2.** *страд. от* **распу́тывать**

**РАСПУ́ТЬЕ** *с* **1.** юл саты (сатлығы, айыраһы) **2.** *разг. см.* **распу́тица** ♦ **на распу́тье (быть, стоя́ть и т.п.)** ике арала (булыу, тороу һ.б.), икеләнеп ҡалыу

**РАСПУХА́ТЬ** *несов. см.* **распу́хнуть**

**РАСПУ́ХЛЫЙ,** -ая, -ое *прост.* күпкән, ҡабарынҡы, шешенке; **распу́хлое лицо́** шешенке йөҙ

**РАСПУ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** шешеү, шешенеү, күбеү, ҡабарыу, бүртеү; **па́лец распу́х** бармаҡ шеште **2.** *перен.*, *разг.* саманан тыш артыу, артыҡ ҙурайыу (ҡабарыу, күбәйеү); **шта́ты распу́хли** штат саманан тыш артты

**РАСПУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **распу́чить**

**РАСПУ́ЧИТЬ** *сов. кого-что безл.*; *прост.* ҡабартыу, күбендереү

**РАСПУШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡабартыу, тетеү, тырпайтыу; **распуши́ть шерсть** йөн ҡабартыу; **распуши́ть усы́** мыйыҡ тырпайтыу **2.** (*встопорщить перья — о птицах*) өлпәйтеү, ҡабартыу, тырпайтыу **3.** *кого* (*отругать*) туҙҙырып ташлау, әрләү

**РАСПУШИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡабарыу, өлпәйеү, өлпәкләнеү **2.** (*встопорщить перья*) ҡабарыныу, йөн тырпайтыу (ҡабартыу)

**РАСПУ́ЩЕННОСТЬ** *ж* **1.** (*недисциплинированность*) тәртипһеҙлек, йыйнаҡһыҙлыҡ, тыйнаҡһыҙлыҡ; **ему́ прису́ща распу́щенность** уға тәртипһеҙлек хас **2.** (*развратность*) аҙғынлыҡ, әҙәпһеҙлек, боҙолоу; **распу́щенность нра́вов** әхлаҡи боҙолоу

**РАСПУ́ЩЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **распусти́ть 2.** *прил.* тәртипһеҙ, тыйнаҡһыҙ, әҙәпһеҙ; **распу́щенный подро́сток** тәртипһеҙ үҫмер **3.** *прил.* аҙғын, боҙоҡ; **распу́щенная жизнь** аҙғын тормош

**РАСПЫЛА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** янып китеү, ныҡ яна башлау **2.** (*сильно покраснеть*) ныҡ ҡыҙарып китеү, ҡыҙыллыҡ йүгереү

**РАСПЫЛЕ́НИЕ** *с см.* **распыли́ть — распыля́ть, распыли́ться — распыля́ться**; **распыле́ние удобре́ний** ашлама һибеү

**РАСПЫЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **распыли́ть 2.** *прил.*; *перен.* (*раздробленный*) тарҡау, тарау; **распылённые крестья́нские хозя́йства** тарҡау крәҫтиән хужалыҡтары

**РАСПЫЛИ́ТЕЛЬ** *м* һиптергес, бөркәүес; **распыли́тель воды́** һыу һиптергес

**РАСПЫЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*измельчить*) ваҡлау, онтау **2.** һиптереү, һибеү, бөркөү, сәсрәтеү; **распыли́ть лека́рство** дарыу һиптереү **3.** *кого-что*; *перен.* (*рассеять, лишая этим силы*) тарҡатыу, бүлгеләү; **распыли́ть внима́ние** иғтибарҙы бүлеү; **распыли́ть си́лы** көстәрҙе бүлгеләү

**РАСПЫЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ваҡланыу, туҙанға әйләнеү **2.** *перен.* тарҡалыу, таралышыу, бүлгеләнеү, ваҡланыу; **си́лы распыли́лись** көстәр тарҡалды

**РАСПЫЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **распыли́ть**

**РАСПЫЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **распыли́ться 2.** *страд. от* **распыля́ть**

**РАСПЯ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **распя́лить**

**РАСПЯ́ЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **распя́ливать**

**РАСПЯ́ЛИТЬ** *сов. что*; *разг., спец.* киреү, ҙур итеп асыу; **распя́лить шку́ру** тирене киреү

**РАСПЯ́ТИЕ** *с* **1.** *см.* **распя́ть 2.** тәре (*кул-аяҡтары киреп ҡаҙаҡланған Иисус Христос һыны*)

**РАСПЯ́ТЬ** *сов. кого*; *ист. что* тәрегә ҡаҙаҡлау (*боронғо яза ысулы*)

**РАССА́ДА** *ж* үрсетмә; **помидо́рная расса́да** помидор үрсетмәһе; **сажа́ть расса́ду** үрсетмә ултыртыу

**РАССАДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* урынлаштырыу, ултыртыу; **рассади́ть госте́й** ҡунаҡтарҙы ултыртыу **2.** *кого-что* айырып (айырым) ултыртыу; **рассади́ть шалуно́в** шаяндарҙы айырып ултыртыу **3.** *что* (*растения*) һирәгәйтеп (күсереп) ултыртыу; **рассади́ть клубни́ку** баҡса еләген һирәгәйтеп ултыртыу; **рассади́ть сморо́дину** ҡарағат күсереп ултыртыу **4.** *прост.* (*разбить сильным ударом*) ватыу, онтау, вата (онтай) һуғыу; **рассади́ть окно́** тәҙрә ватыу

**РАССА́ДНИК** *м* **1.** *с.-х.* үрсеткес; **расса́дник цвето́в** сәскәләр үрсеткес; **расса́дник племенно́го скота́** тоҡом малы үрсеткес **2.** *чего*; *перен.* сығанаҡ, үҙәк, усаҡ; **расса́дник просвеще́ния** аңбелем усағы; **расса́дник зара́зы** йоғошло ауырыу сығанағы

**РАССА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **рассади́ть**

**РАССА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассе́сться** I 1; **2.** *страд. от* **расса́живать**

**РАССА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **рассоса́ть**

**РАССА́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассоса́ться 2.** *страд. от* **расса́сывать**

**РАССВЕ́РЛИВАТЬ** *несов. см.* **рассверли́ть**

**РАССВЕ́РЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассверли́ться 2.** *страд. от* **рассве́рливать**

**РАССВЕРЛИ́ТЬ** *сов. что* быраулап киңәйтеү; **рассверли́ть тру́бку** төрөпкәне быраулап киңәйтеү

**РАССВЕРЛИ́ТЬСЯ** *сов.* киңәйеү, ҙурайыу (*быраулан*)

**РАССВЕСТИ́** *сов. безл.* яҡтырыу, таң атыу; **давно́ рассвело́** күптән яҡтырҙы

**РАССВЕ́Т** *м* **1.** таң, таң атыу; **на рассве́те** таңда; **с рассве́том** таң менән; **до рассве́та** таңға тиклем **2.** *чего*; *перен.* башланғыс осор, таң; **на рассве́те жи́зни** ғүмер таңында

**РАССВЕТА́ТЬ** *несов. см.* **рассвести́**

**РАССВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое таң ...ы; **рассве́тное вре́мя** таң ваҡыты

**РАССВИРЕПЕ́ТЬ** *сов.* (бик) ныҡ ярһыу (асыуланыу), ҡотороноу; **медве́дь рассвирепе́л** айыу ныҡ ярһыны

**РАССВИСТЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һыҙғырырға тотоноу, туҡтауһыҙ һыҙғырыу

**РАССЕ́В** *м* **1.** *см.* **рассе́ять — рассева́ть**; **рассе́в семя́н** орлоҡ сәсеү **2.** сорттарға айырыусы (таҙартыусы) машина

**РАССЕВА́ТЬ** *несов. см.* **рассе́ять** 1

**РАССЕВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **рассева́ть**

**РАССЕДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **рассе́сться** II

**РАССЕДЛА́ТЬ** *сов. кого* эйәрен алыу (һалдырыу); **расседла́ть лошаде́й** аттарҙың эйәрен һалдырыу

**РАССЕДЛА́ТЬСЯ** *сов.* эйәре алыныу (һалыныу)

**РАССЁДЛЫВАТЬ** *несов. см.* **расседла́ть**

**РАССЁДЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расседла́ться 2.** *страд. от* **рассёдлывать**

**РАССЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **рассе́ять**

**РАССЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассе́яться** **2.** *страд. от* **рассе́ивать**

**РАССЕКА́ТЬ** *несов. см.* **рассе́чь**

**РАССЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассе́чься** **2.** *страд. от* **рассека́ть**

**РАССЕКРЕ́ТИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*сделать известным что-л. секретное*) серҙе асыу, йәшерен булмау **2.** *кого-что*; *разг.* йәшерен эштән алыу, йәшерен эштән бушатыу; **рассекре́тить аге́нта** агентты йәшерен эштән алыу

**РАССЕКРЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **рассекре́тить**

**РАССЕКРЕ́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **рассекре́чивать**

**РАССЕЛЕ́НИЕ** *с см.* **рассели́ть — расселя́ть, рассели́ться — расселя́ться**; **расселе́ние живо́тных** хайуандарҙы айырыу

**РАССЕ́ЛИНА** *ж* ер (тау, ҡая) ярығы (ҡыуышлығы); **ключ бьёт из рассе́лины горы́** шишмә тау ярығынан сыға

**РАССЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*разместить, поселив где-л.*) күсереп ултыртыу, айырыу, (таратып) урынлаштырыу; **рассели́ть по кварти́рам** фатирҙарға урынлаштырыу **2.** (*поселить отдельно живущих в одном месте*) айырым (тарау итеп) ултыртыу (урынлаштырыу); **рассели́ть сосе́дей** күршеләрҙе айырым урынлаштырыу

**РАССЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** урынлашыу, килеп (күсеп) ултырыу; **рассели́ться по реке́** йылға буйлап урынлашыу **2.** (*поселиться порознь*) айырым-айырым урынлашыу, таралып ултырыу

**РАССЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **рассели́ть**

**РАССЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассели́ться** **2.** *страд. от* **расселя́ть**

**РАССЕРДИ́ТЬ** *сов. кого-что* асыуландырыу, асыуын килтереү (ҡабартыу)

**РАССЕРДИ́ТЬСЯ** *сов. на кого-что* и *без доп.* асыуланыу, асыу килеү (ҡабарыу)

**РАССЕРЧА́ТЬ** *сов.*; *прост. см.* **рассерди́ться**

**РАССЕ́СТЬСЯ I** *сов.* **1.** ултырышыу, урынлашыу; **де́ти рассе́лись по места́м** балалар урындарына ултырыштылар **2.** *разг.*, *неодобр.* йәйелеп (иркенләп) ултырыу; **рассе́сться на дива́не** диванда йәйелеп ултырыу

**РАССЕ́СТЬСЯ II** *сов.* (*оседая, дать трещины*) баҫылып ярылыу (сатнау); **стена́ рассе́лась** стена баҫылып ярылды

**РАССЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡырҡыу, ярыу, телеү, тураҡлау; **рассе́чь у́зел** төйөндө ҡырҡыу; **рассе́чь поле́но** түмәр ярыу; **рассе́чь ту́шу** түшкәне тураҡлау **2.** *что* (*поранить*) ҡырҡып (телеп, ярып) ебәреү, ҡырҡыу, телеү, ярыу; **рассе́чь губу́** иренде телеү **3.** *перен.* ярып үтеү; **теплохо́д рассёк во́лны** теплоход тулҡындарҙы ярып үтте **4.** *воен.* бүлеү, уртаға айырыу; **рассе́чь фронт** фронтты уртаға айырыу

**РАССЕ́ЧЬСЯ** *сов.* айырылыу (*сәс, еп тураһында*)

**РАССЕ́ЯННОСТЬ** *ж* **1.** хәтерһеҙлек, онотоусанлыҡ; **рассе́янность ученика́** уҡыусының хәтерһеҙлеге **2.** тарҡаулыҡ; **рассе́янность поселе́ний** ауылдарҙың тарҡаулығы

**РАССЕ́ЯННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **рассе́ять** **2.** *прил.* тарау, тарҡау, таралып (һибелеп) ултырған; **рассе́янное на большо́м простра́нстве населе́ние** ҙур арауыҡҡа таралып ултырған халыҡ **3.** *прил.* тоноҡ, таралған, һибелгән, сәселгән; **рассе́янный свет** тоноҡ яҡтылыҡ; **рассе́янная эне́ргия** таралған энергия **4.** *прил.* хәтерһеҙ, онотоусан, тарҡау, иғтибарһыҙ; **рассе́янный челове́к** хәтерһеҙ кеше; **рассе́янный взгляд** иғтибарһыҙ ҡараш **5.** *прил.* (*праздный*) эшһеҙ, буш, ғәмһеҙ; **рассе́янная жизнь** ғәмһеҙ тормош

**РАССЕ́ЯТЬ** *сов. что* **1.** сәсеү, һибеү, сәсеп (һибеп) сығыу; **рассе́ять семена́** орлоҡ сәсеү **2.** *кого*; *обычно в ф. кратк. прич.* таратып (тарҡау, тарау) урынлаштырыу; **сёла рассе́яны** ауылдар тарау урынлаштырылған **3.** таратыу, һибеү, сәсеү; **рассе́ять лучи́** нурҙар таратыу **4.** *кого* (ҡыуып) таратыу (ебәреү), таратып ебәреү; **рассе́ять неприя́тельскую кавале́рию** дошмандың атлы ғәскәрен ҡыуып ебәреү **5.** *перен.* таратыу, юҡҡа сығарыу, бөтөрөү, оноттороу; **рассе́ять ло́жные слу́хи** ялған хәбәрҙәрҙе юҡҡа сығарыу

**РАССЕ́ЯТЬСЯ** *сов.* **1.** таралыу, таралып урынлашыу, йәйелеү; **рассе́яться по всему́ по́лю** бөтә ялан буйлап таралыу **2.** таралыу (*томан, төтөн тураһында*); **дым рассе́ялся** төтөн таралды **3.** (*разбежаться*) төрлө яҡҡа ҡасыу, таралып ҡасыу, һибелеү; **коло́нна неприя́теля рассе́ялась** дошман колоннаһы таралып ҡасты **4.** *перен.* (*развеяться*) юҡҡа сығыу, юҡ булыу, юғалыу, бөтөү; **напряже́ние рассе́ялось** көсөргәнеш юҡҡа сыҡты **5.** *перен.* (*развлечься*) уй-фекерҙән арынып (бушанып) тороу, онотолоп (йыуанып) алыу, күңел асыу; **рассе́яться по́сле заня́тий** уҡыуҙан һуң күңел асыу

**РАССКА́З** *м* **1.** *см.* **рассказа́ть — расска́зывать**; **прерва́ть расска́з** һүҙҙе бүлеү; **расска́з очеви́дца** күргән кешенең һөйләүе **2.** хикәйә; **сбо́рник расска́зов** хикәйәләр йыйынтығы; **расска́зы С.Аги́ша** С.Агиш хикәйәләре

**РАССКАЗА́ТЬ** *сов. что, о ком-чём* һөйләү, һөйләп биреү, хикәйәләү, хикәйә итеү; **рассказа́ть ска́зку** әкиәт һөйләү

**РАССКА́ЗИК** *м* бәләкәй (уймаҡ) хикәйә

**РАССКА́ЗЧИК** *м* и **РАССКА́ЗЧИЦА** *ж* **1.** хикәйәсе, һөйләүсе; **расска́зчик ска́зок** әкиәт һөйләүсе **2.** оҫта (яҡшы) һөйләүсе

**РАССКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **рассказа́ть**

**РАССКА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *обычно безл.* һөйләнеү, тасуирланыу **2.** *страд. от* **расска́зывать**

**РАССКАКА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*сильно разогнаться на скаку*) шәп саба башлау (сабыу)

**2.** (*скача, разъехаться*) төрлө яҡҡа сабып сығып китеү (таралыу)

**РАССЛАБЕВА́ТЬ** *несов. см.* **расслабе́ть**

**РАССЛАБЕ́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **рассла́бнуть**

**РАССЛА́БИТЬ** *сов. кого-что* хәлһеҙләндереү, ҡаҡшатыу, көсһеҙләндереү, көс алыу; **боле́знь рассла́била органи́зм** ауырыу организмды көсһеҙләндерҙе

**РАССЛА́БЛЕННОСТЬ** *ж* хәлһеҙлек, көсһеҙлөк; **рассла́бленность органи́зма** организмдың хәлһеҙлеге

**РАССЛА́БЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **рассла́бить** **2.** *прил.* хәлһеҙ, көсһөҙ, хәлһеҙләнгән, талсыҡҡан; **рассла́бленный го́лос** көсһөҙ тауыш

**РАССЛАБЛЯ́ТЬ** *несов.* **рассла́бить**

**РАССЛАБЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **расслабля́ть**

**РАССЛА́БНУТЬ** *сов.*; *разг.* хәлһеҙләнеү, көсһөҙләнеү, талыҡһырау; **рассла́бнуть от жары́** эҫелектән хәлһеҙләнеү; **му́скулы рассла́бли** мускулдар көсһөҙләнде

**РАССЛА́ВИТЬ** *сов. кого-что, о чём*; *разг.* данын (яманатын) сығарыу (һатыу); **рассла́вить по всему́ го́роду** бөтә ҡалаға яманатын һатыу

**РАССЛАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **рассла́вить**

**РАССЛА́ИВАТЬ** *несов. см.* **расслои́ть**

**РАССЛА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расслои́ться** **2.** *страд. от* **рассла́ивать**

**РАССЛЕ́ДОВАНИЕ** *с см.* **рассле́довать**; **рассле́дование происше́ствия** ваҡиғаны тикшереү

**РАССЛЕ́ДОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** (*всесторонне изучить*) тикшереү, тикшеренеү; **рассле́довать вопро́с** мәсьәләне тикшереү **2.** (*произвести следствие*) тәфтишләү, тикшереү үткәреү; **рассле́довать де́ло** эште тәфтишләү

**РАССЛОЕ́НИЕ** *с см.* **расслои́ть**, **расслои́ться**; **расслое́ние те́ста** ҡамырҙы ҡатлаулау; **иму́щественное расслое́ние населе́ния** халыҡтың мөлкәт яғынан ҡатламдарға бүленеүе

**РАССЛОЙТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡатлаулау, ҡатлауҙарға бүлеү; **расслои́ть карто́н** ҡатырғаны ҡатлауҙарға бүлеү **2.** *кого-что*; *перен.* ҡатламлау, ҡатламдарға (төркөмдәргә) бүлеү (айырыу); **расслои́ть населе́ние** халыҡты ҡатламдарға бүлеү

**РАССЛОЙТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡатлауланыу, ҡатламланыу; **го́рная поро́да расслои́лась** тау тоҡомо ҡатламланған **2.** (ҡатламдарға) айырылыу (бүленеү); **рассла́иваться на кла́ссы** синыфтарға бүленеү

**РАССЛЫ́ШАТЬ** *сов. кого-что* и *без доп.* (асыҡ) ишетеү, ишетеп еткереү; **рассл́ышать всё до после́днего сло́ва** һуңғы һүҙҙәренә тиклем бөтәһен дә ишетеү

**РАССМА́ТРИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **рассмотре́ть** 2, 3; **2.** (*обычно в сочетании с "как"*) ҡарау, һанау, иҫәпләү; **рассма́тривать предложе́ние как реа́льное** тәҡдимде тормошҡа ашырлыҡ тип ҡарау

**РАССМА́ТРИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **рассма́тривать**

**РАССМЕШИ́ТЬ** *сов. кого-что* көлдөрөү; **рассмеши́ть шу́тками** шаяртып көлдөрөү

**РАССМЕЯ́ТЬСЯ** *сов.* көлә башлау, көлөп ебәреү

**РАССМОТРЕ́НИЕ** *с см.* **рассмотре́ть**; **рассмотре́ние прое́кта** проектты тикшереү

**РАССМОТРЕ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*разглядеть, всматриваясь*) ентекләп (ныҡлап) ҡарау, күреп алыу; **рассмотре́ть на́дпись** яҙыуҙы ентекләп ҡарау **2.** (*смотря, ознакомиться с чем-л.*) ҡарау, айырыу, ҡарап табыу (таныу); **рассмотре́ть лист в микроско́п** япраҡты микроскоптан ҡарау **3.** ҡарау, тикшереү; **рассмотре́ть вопро́с** мәсьәләне тикшереү; **тща́тельно рассмотре́ть все да́нные** бөтә мәғлүмәттәрҙе ентекләп ҡарау

**РАССОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* тыҡҡылау, тыҡҡылап (тығып, урынлаштырып) бөтөрөү; **рассова́ть ве́щи по карма́нам** әйберҙәрҙе кеҫәләргә тығып бөтөрөү

**РАССО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **рассова́ть**

**РАССО́Л** *м* **1.** тоҙлама; **сла́бый рассо́л** көсһөҙ (йомшаҡ) тоҙлама; **огуре́чный рассо́л** ҡыяр тоҙламаһы **2.** тоҙло һыу (*ҡайнатып тоҙ алыу өсөн ҡулланыла*) **3.** *тех.* тоҙ иретмәһе

**РАССО́ЛЬНИК** *м* рассольник

**РАССО́РИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* талаштырыу, әрләштереү, ыҙғыштырыу, ара боҙоу; **рассо́рить сосе́дей** күршеләрҙе талаштырыу

**РАССОРИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* ҡыйлау, сүпләү, таратып (туҙҙырып) ташлау; **рассори́ть бума́ги по́ полу** иҙәнгә ҡағыҙҙар туҙҙырып ташлау

**РАССО́РИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* талашыу, әрләшеү, ыҙғышыу, асыуланышыу; **рассо́риться с сослужи́вцами** хеҙмәттәштәр менән асыуланышыу

**РАССОРИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡойолоп түгелеү (сәселеү)

**РАССОРТИРОВА́ТЬ** *сов.*; *кого-что* сорттарға айырыу (бүлеү), айырыу, бүлеү; **рассортирова́ть това́ры** тауарҙарҙы сорттарға айырыу

**РАССОРТИРО́ВКА** *ж см.* **рассортирова́ть** — **рассортиро́вывать**; **рассортиро́вка зерна́** ашлыҡты сорттарға бүлеү; **рассортиро́вка пи́сем** хаттарҙы айырыу

**РАССОРТИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **рассортирова́ть**

**РАССОСА́ТЬ** *сов. что* **1.** кәметеү, шиңдереү, ҡайтарыу; **компре́ссами рассоса́ть о́пухоль** боҫлама һалып шеште ҡайтарыу **2.** *прост.* (*сосанием размягчить*) имеп йомшартыу

**РАССОСА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** кәмеү, шиңеү, ҡайтыу; **о́пухоль рассоса́лась** шеш ҡайтҡан **2.** *перен., разг.* әкренләп таралыу; **о́чередь рассоса́лась** сират әкренләп таралды

**РАССО́ХНУТЬСЯ** *сов.* кибеү, ҡорғаҡһыу; **бо́чка рассо́хлась** мискә ҡорғаҡһыған

**РАССПРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **расспроси́ть**

**РАССПРО́С** *м.* **1.** *см.* **расспроси́ть** — **расспра́шивать** **2.** *мн.* **расспро́сы** һорашыу, һорауҙар; **отвеча́ть на расспро́сы** һорауҙарға яуап биреү

**РАССПРОСИ́ТЬ** *сов. кого, о чём* һорашыу, һорашып белешеү, һораштырыу, белешеү; **расспроси́ть подро́бно** төпсөп һорашыу

**РАССРЕДОТО́ЧЕНИЕ** *с см.* **рассредото́чить**

**РАССРЕДОТО́ЧИВАТЬ** и **РАССРЕДОТА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **рассредото́чить**

**РАССРЕДОТО́ЧИВАТЬСЯ** и **РАССРЕДОТА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассредото́читься** **2.** *страд. от* **рассредото́чивать**

**РАССРЕДОТО́ЧИТЬ** *сов. кого-что* таратыу, таратып урынлаштырыу; **рассредото́чить войска́** ғәскәрҙе таратып урынлаштырыу

**РАССРЕДОТО́ЧИТЬСЯ** *сов.* таралып (һибелеп) урынлашыу, таралышып урынлашыу; **партиза́ны рассредото́чились** партизандар таралып урынлашты

**РАССРО́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **рассро́чить**

**РАССРО́ЧИТЬ** *сов. что* кисектереү, бүлеп (ваҡлап) түләү (биреү), срогын оҙонайтыу; **рассро́чить упла́ту до́лга** бурысты бүлеп түләү

**РАССРО́ЧКА** *ж см.* **рассро́чить** — **рассро́чивать** ♦ **в рассро́чку (купи́ть, прода́ть)** бүлеп түләү шарты менән (алыу, һатыу)

**РАССТАВА́НИЕ** *с см.* **расстава́ться**; **час расстава́ния** айырылышыу сәғәте

**РАССТАВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **расста́ться**

**РАССТА́ВИТЬ** *сов. что* **1.** *кого* урынлаштырыу, ҡуйыу, теҙеп ҡуйыу, урынлаштырып (ҡуйып) сығыу; **расста́вить кни́ги в шкафу́** китаптарҙы шкафҡа ҡуйыу; **расста́вить ша́хматы на доске́** шахматтарҙы таҡтаға теҙеп ҡуйыу; **расста́вить часовы́х** һаҡсылар ҡуйыу **2.** *разг.* һалыу, ҡуйыу, ҡороу, ҡороп (һалып) ҡуйыу; **расста́вить капка́ны** ҡапҡан ҡороу; **расста́вить се́ти** ау һалыу **3.** (*раздвинуть*) айырыу, айырып (йәйеп) ҡуйыу, тарбайтыу, йәйеү; **расста́вить но́ги** аяҡтарҙы тарбайтыу; **расста́вить но́жки ци́ркуля** циркулде айырып ҡуйыу **4.** *разг., спец.* киңәйтеү, ялғап киңәйтеү; **расста́вить во́рот руба́хи** күлдәк яғаһын ялғап киңәйтеү

**РАССТА́ВИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* урынлашыу, ҡуйылыу, урынлаштырылыу, теҙелеү; **ме́бель удо́бно расста́вилась** йорт йыһазы уңайлы урынлаштырылды

**РАССТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **расста́вить**

**РАССТАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расста́виться** **2.** *страд. от* **расставля́ть**

**РАССТАНО́ВКА** *ж* **1.** урынлаштырыу; **расстано́вка ме́бели** йорт йыһаздарын урынлаштырыу **2.** (*порядок размещения чего-л.*) ҡуйылыш, урынлаштырыу (*урынлаштырыу тәртибе*); **расстано́вка зна́ков препина́ния** тыныш билдәләренең ҡуйылышы; **расстано́вка слов в предложе́нии** һөйләмдә һүҙҙәрҙе урынлаштырыу **3.** тыныш, туҡталыш, тынып (туҡталып) тороу; **чита́ть с расстано́вками** туҡталыш яһап уҡыу

**РАССТА́ТЬСЯ** *сов. с кем-чем.* **1.** *без доп.* айырылыу, айырылышыу, айырылып (ҡалдырып) китеү, хушлашыу; **друзья́ расста́лись** дуҫтар айырылышты; **расста́ться навсегда́** бөтөнләйгә айырылыу; **расста́ться с родны́м село́м** тыуған ауылды ҡалдырып китеү **2.** (*отказаться от кого-чего-л.*) һаубуллашыу, хушлашыу; **расста́ться с мечто́й** хыял менән хушлашыу

**РАССТЕГА́Й** *м* **1.** асығауыҙ; **расстега́й с мя́сом** итле асығауыҙ **2.** (*старинный распашной сарафан*) расстегай (*иҙеүләп тегелгән сарафан*)

**РАССТЕГА́ТЬ** *сов. что* (*прошить узорчатой стёжкой*) һырыу; **расстега́ть одея́ло** юрған һырыу

**РАССТЁГИВАТЬ I** *несов. см.* **расстегну́ть**

**РАССТЁГИВАТЬ II** *несов. см.* **расстега́ть**

**РАССТЁГИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **расстегну́ться** **2.** *страд. от* **расстёгивать** I

**РАССТЁГИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **расстёгивать** II

**РАССТЕГНУ́ТЬ** *сов. что* ысҡындырыу, сисеү, ысҡындырып (сисеп) ебәреү; **расстегну́ть во́рот** иҙеүҙе ысҡындырыу

**РАССТЕГНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** кейемде ысҡындырыу (сисеү); **идти́ расстегну́вшись** кейемде ысҡындырып атлау **2.** ысҡыныу, сиселеү; **ремешо́к расстегну́лся** ҡайыш ысҡынған

**РАССТЕЛИ́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **разостла́ть**

**РАССТЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **разостла́ться**

**РАССТИЛА́ТЬ** *несов. см.* **разостла́ть**

**РАССТИЛА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **разостла́ться**; **дым расстила́ется по земле́** төтөн ергә түшәлә **2.** *перен., разг.* (*раболепствовать*) ялағайланыу **3.** *страд. от* **расстила́ть**

**РАССТОЯ́НИЕ** *с* **1.** ара, аралыҡ, алыҫлыҡ, ер; **да́льнее расстоя́ние** алыҫ ара; **расстоя́ние в пять киломе́тров** биш километр ара **2.** *перен.* айырма, ара, алыҫлыҡ; **расстоя́ние ме́жду ни́ми** улар араһындағы айырма ♦ **держа́ть на изве́стном (почти́тельном) расстоя́нии** үҙеңә яҡын ебәрмәү

**РАССТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **расстро́ить**

**РАССТРА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **расстро́иться** **2.** *страд. от* **расстра́ивать**

**РАССТРЕ́Л** *м* **1.** *см.* **расстреля́ть** — **расстре́ливать** **2.** (*казнь*) атыу; **приговори́ть к расстре́лу** атырға хөкөм итеү

**РАССТРЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **расстреля́ть**

**РАССТРЕЛЯ́ТЬ** *сов. что* **1.** *кого* атыу, атып үлтереү; **расстреля́ть преда́телей** хыянатсыларҙы атыу **2.** *кого* атыу, утҡа тотоу; **расстреля́ть вра́жеский кора́бль** дошман карабын утҡа

тотоу **3.** (*израсходовать при стрельбе*) атып бөтөрөү; **расстреля́ть все патро́ны** бөтә патрондарҙы атып бөтөрөү

**РАССТРО́ЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **расстро́ить** **2.** *прил.* (*беспорядочный*) тарҡау, тәртипһеҙ; **расстро́енное во́йско** тарҡау ғәскәр **3.** *прил.* (*пришедший в упадок*) емерек, тарҡау, емерелгән, тарҡалған; **расстро́енное хозя́йство** емерек хужалыҡ **4.** *прил.* насар, боҙоҡ, ҡаҡшаған; **расстро́енное здоро́вье** ҡаҡшаған һаулыҡ **5.** *прил.* көйһөҙләнгән, боҙоҡ, көйһөҙ; **расстро́енный роя́ль** көйһөҙ рояль **6.** *прил.* (*выражающий расстройство*) кәйефһеҙ, борсоулы; **расстро́енный вид** борсоулы ҡиәфәт

**РАССТРО́ИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*нарушить порядок*) туҙҙырыу, тарҡатыу, сафты боҙоу; **расстро́ить ряды́ проти́вника** дошман сафын туҙҙырыу **2.** (*привести в упадок*) емереү, тарҡатыу, зыян (харап) итеү, рәтен ебәреү; **расстро́ить хозя́йство** хужалыҡты тарҡатыу **3.** *что* (*нарушить, помешать*) боҙоу, ҡамасаулау, өҙөү, емереү, юҡҡа сығарыу; **расстро́ить пла́ны** пландарҙы юҡҡа сығарыу **4.** *что* (*привести в болезненное состояние*) ҡаҡшатыу, насарайтыу, боҙоу; **расстро́ить не́рвы** нервыларҙы ҡаҡшатыу **5.** *что* (*нарушить лад музыкального инструмента*) көйһөҙләү, көйһөҙләндереү, көйөн боҙоу; **расстро́ить скри́пку** скрипканың көйөн боҙоу **6.** *кого* (*огорчить*) күңелһеҙләндереү, кәйеф боҙоу (ебәреү); **расстро́ить неприя́тным письмо́м** күңелһеҙ хат менән кәйеф боҙоу

**РАССТРО́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** саф боҙолоу, тарҡалыу, туҙыу; **коло́нна расстро́илась** колонна сафы боҙолдо **2.** емерелеү, тарҡалыу; **дела́ колхо́за расстро́ились** колхоз эштәре тарҡалды **3.** (*прерваться*) боҙолоу, өҙөлөү; **игра́ расстро́илась** уйын өҙөлдө; **отноше́ния расстро́ились** мөнәсәбәттәр боҙолдо **4.** ҡаҡшау, боҙолоу; **здоро́вье расстро́илось** һаулыҡ ҡаҡшаны **5.** көйһөҙләнеү, көйө боҙолоу; **мандоли́на расстро́илась** мандолинаның көйө боҙолған **6.** күңелһеҙләнеү, кәйеф боҙолоу (ҡырылыу); **расстро́иться из-за плохо́го изве́стия** насар хәбәрҙән кәйеф ҡырылыу

**РАССТРО́ЙСТВО** *с* **1.** (*состояние упадка вследствие нарушения порядка в чём-л.*) төшөнкөлөк, рәт китеү, хәл насарланыу **2.** тарҡалыш, тәртипһеҙлек, емереклек, тарҡатыу; **внести́ расстро́йство в ряды́ проти́вника** дошман сафын тарҡатыу **3.** боҙолоу, ҡаҡшау, яҙыу, насарайыу; **расстро́йство кровообраще́ния** ҡан йөрөшө боҙолоу; **расстро́йство па́мяти** хәтер насарайыу **4.** (*огорчение*) кәйеф ҡырылыу, күңел төшөү; **быть в расстро́йстве** күңел төшөнкө булыу

**РАССТУПА́ТЬСЯ** *несов. см.* **расступи́ться**

**РАССТУПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ике яҡҡа айырылыу, юл биреү, йырылыу, юл асыу; **толпа́ расступи́лась** халыҡ төркөмө ике яҡҡа айырылды **2.** *перен.* (*разойтись — о земле, воде и т.п.*) ярылыу, ярылып китеү, ике яҡҡа айырылыу, убылыу, убылып төшөү; **земля́ расступи́лась** ер убылды

**РАССТЫКОВА́ТЬ** *сов. что* айырыу

**РАССТЫКОВА́ТЬСЯ** *сов.* айырылыу

**РАССТЫКО́ВКА** *ж см.* **расстыкова́ть**, **расстыкова́ться**; **расстыко́вка косми́ческих корабле́й** йыһан караптарының айырылыуы

**РАССУДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* аҡыл, аҡыллылыҡ, уйлап (аҡыл менән) эшләнгәнлек; **рассуди́тельность челове́ка** кешенең аҡыллылығы

**РАССУДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*благоразумный*) аҡыллы, аңлы, төплө; **рассуди́тельный челове́к** аҡыллы кеше **2.** (*исполненный здравого смысла*) уйлап (аҡыл менән) эшләнгән, аҡыллы; **рассуди́тельный посту́пок** уйлап эшләнгән эш; **рассуди́тельное реше́ние** аҡыллы ҡарар

**РАССУДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* хәл (ҡарар) итеү, ҡарар сығарыу, һөҙөмтә яһау; **рассуди́ть спор** бәхәсте хәл итеү **2.** *что* и *без доп.* уйлап ҡарау, хәл итеү; **рассуди́те, как быть** нимә эшләргә икәнен уйлап ҡарағыҙ

**РАССУ́ДОК** *м* **1.** (*ум, сознание*) аҡыл; **де́ятельность рассу́дка** аҡыл эшмәкәрлеге **2.** аң, иҫ, фекер, аҡыл; **потеря́ть рассу́док** аң юғалтыу ♦ **быть в по́лном рассу́дке** иҫе дөрөҫ булыу, аҡылы теүәл булыу

**РАССУ́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҡыл ...ы; **рассу́дочная де́ятельность** аҡыл эшмәкәрлеге **2.** (*отвлечённый*) артыҡ дөйөм **3.** (*отличающийся преобладанием рассудка над чувством*) артыҡ ҡоро, аҡылға нигеҙләнгән, аҡыл өҫтөнлөк иткән, һалҡын аҡыл менән; **рассу́дочный челове́к** артыҡ ҡоро кеше

**РАССУЖДА́ТЬ** *несов.* **1.** (*мыслить*) уйлау, фекер (хөкөм, уй) йөрөтөү, фекерләү; **научи́ться рассужда́ть** фекер йөрөтөргә өйрәнеү; **рассужда́ть пра́вильно** дөрөҫ фекер йөрөтөү **2.** *о ком-чём*; *разг.* (*говорить, обсуждать*) фекер алышыу, әңгәмәләшеү, һөйләү, һөйләнеү; **рассужда́ть на ра́зные те́мы** төрлө темаға әңгәмәләшеү

**РАССУЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **рассужда́ть**; **пра́вильное рассужде́ние** дөрөҫ фекерләү **2.** *обычно мн.* **рассужде́ния**; *разг.* (*разговоры*) һөйләшеү, әңгәмәләшеү, әңгәмә, һүҙ ҡуйыртыу; **пусти́ться в рассужде́ния** әңгәмәләшергә тотоноу; **де́лать без рассужде́ний** һүҙ ҡуйыртмайынса эшләү **3.** *книжн., уст.* (*сочинение*) ғилми хеҙмәт

**РАССУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **рассуди́ть**

**РАССУПО́НИВАТЬ** *несов. см.* **рассупо́нить**

**РАССУПО́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассупо́ниться** **2.** *страд. от* **рассупо́нивать**

**РАССУПО́НИТЬ** *сов. кого-что* тамаҡбауын (сөйөлдөрөгөн) сисеү; **рассупо́нить ло́шадь** аттың тамаҡбауын сисеү

**РАССУПО́НИТЬСЯ** *сов.* **1.** тамаҡбау сиселеү (ысҡыныу) **2.** *прост.* (*раздеться*) сисенеү

**РАССУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **рассучи́ть**

**РАССУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассучи́ться 2.** *страд. от* **рассу́чивать**

**РАССУЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** һүтеү, тағатыу; **рассучи́ть верёвку** бау һүтеү **2.** *разг.* (төрөлгәнде) төшөрөү; **рассучи́ть рукава́** еңде төшөрөү

**РАССУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* һүтелеү, тағатылыу; **верёвка рассучи́лась** арҡан тағатылды

**РАССЧИ́ТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **рассчита́ть 2.** *прил.* уйланылған, (алдан) уйлап эшләнгән, юрый, юрамал эшләнгән; **рассчи́танная медли́тельность** юрамал яйлау

**РАССЧИТА́ТЬ** *сов. кого* **1.** *что* (*произвести подсчёт*) иҫәпләү, иҫәпләп сығарыу, хисаплау; **рассчита́ть де́ньги** аҡса иҫәпләү; **рассчита́ть сто́имость** *чего-л. нимәнеңдер* хаҡын иҫәпләп сығарыу **2.** *без доп.* (*учесть всё*) баһалап еткереү, иҫәпкә алыу; **не рассчита́ть свои́х сил** үҙ көсөңдө баһалап еткермәү **3.** (*уволить, выдав заработанные деньги*) (иҫәпте өҙөп) эштән сығарыу, расчёт биреү; **рассчита́ть сотру́дника** хеҙмәткәргә расчёт биреү **4.** *спец.* (тәртип буйынса) һанатыу, һанатып сығыу; **рассчита́ть взвод** взводты һанатыу

**РАССЧИТА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *с кем-чем* и *без доп.* (*расплатиться*) иҫәпләшеү, иҫәпте өҙөү, (тулыһынса) түләп бөтөрөү; **рассчита́ться с долга́ми** бурыстарҙы түләп бөтөрөү **2.** *разг.* (*уволиться*) иҫәпләшеп эштән сығыу, расчёт алыу **3.** *с кем*; *разг.* (*отомстить*) үс алыу, иҫәпләшеү, ҡоһорон ҡайтарыу; **я с тобо́й ещё рассчита́юсь** мин әле һинең менән иҫәпләшермен **4.** *спец.* һанау, һанап сығыу; **рассчита́ться по поря́дку номеро́в** рәт буйлап һанау

**РАССЧИ́ТЫВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **рассчита́ть 2.** *на что* и *с неопр.* (*надеяться*) иҫәп тотоу, өмөт итеү (бағлау), уйлау, самалау; **рассчи́тывать получи́ть бога́тый урожа́й** мул уңыш алырға иҫәп тотоу; **рассчи́тывать на внима́ние** иғтибарға өмөт итеү **3.** *на кого-что* (*полагаться*) ышаныу, өмөт итеү, арҡаланыу; **рассчи́тывать на друзе́й** дуҫтарға арҡаланыу

**РАССЧИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассчита́ться 2.** *за кого-что* яуап биреү, яуаплылыҡты күтәреү; **рассчи́тываться за свои́ посту́пки** үҙеңдең ҡылған эштәрең өсөн яуап биреү

**РАССЫЛА́ТЬ** *несов см.* **разосла́ть**

**РАССЫЛА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **рассыла́ть**

**РАССЫ́ЛКА** *ж см.* **разосла́ть – рассыла́ть** 1; **рассы́лка пи́сем** хаттарҙы ебәреү

**РАССЫ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое ебәреү ...ы, таратыу ...ы; **рассы́лочное отделе́ние** таратыу бүлексәһе

**РАССЫ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ебәреү ...ы, таратыу ...ы; **рассы́льная кни́га** таратыу китабы **2.** *в знач. сущ.* **рассы́льный** *м* и **рассы́льная** *ж* йомошсо; **суде́бный рассы́льный** суд йомошсоһо; **быть рассы́льной** йомошсо булып йөрөү

**РАССЫ́ПАТЬ** *сов. кого-что* **1.** сәсеү, түгеү, һибеү, таратыу, сәсеп (түгеп, һибеп) ебәреү, һирпеү; **рассы́пать крупу́** ярманы түгеп ебәреү; **рассы́пать у́голь** күмер таратыу **2.** (*разместить, насыпая*) һалыу, ҡойоу, тултырыу; **рассы́пать муку́ по мешка́м** ондо тоҡтарға тултырыу **3.** *воен.* таратыу, таратып һалыу; **рассы́пать ро́ту в цепь** ротаны теҙемгә таратыу

**РАССЫПА́ТЬ** *несов. см.* **рассы́пать**

**РАССЫ́ПАТЬСЯ** *сов.* **1.** сәселеү, түгелеү, һибелеү, ҡойолоу; **зерно́ рассы́палось** ашлыҡ түгелде; **бу́сы рассы́пались** мәрйендәр һибелде **2.** (*развалиться*) ҡорғаҡһып таралыу, таралып төшөү, емерелеү; **рассо́хшаяся бо́чка рассы́палась** ҡорғаҡһыған мискә таралып төштө **3.** (*разойтись, разбежаться*) таралыу, таралышыу, һибелеү, китеү; **охо́тники рассы́пались по ле́су** һунарсылар урман буйлап таралды **4.** *в чём* и *без доп.*; *разг.* маҡтау, рәхмәт һүҙҙәре яуҙырыу, яуҙыра башлау; **рассы́паться в благода́рностях** рәхмәттәр яуҙырыу

**РАССЫПА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **рассы́паться 2.** *страд. от* **рассыпа́ть** ♦ **ме́лким бе́сом рассыпа́ться** *см.* **бес**

**РАССЫ́ПКА** *ж* **1.** *см.* **рассы́пать – рассыпа́ть** 1, 2; **рассы́пка удобре́ний** ашлама һибеү **2.** *торг.* (*потеря в весе сыпучих товаров*) түгелеү байы

**РАССЫПНО́Й,** -ая, -ое таралып (тубырлап) торған, һипмә, сәсмә, һибелмә, бөртөклө; **рассыпно́й това́р** бөртөклө тауар ♦ **рассыпно́й строй** *воен.* һибелмә сафтар (*XVIII–XIX бб. йәйәүле ғәскәрҙең бөтә фронт буйынса таралып урынлашыуы*)

**РАССЫ́ПЧАТЫЙ,** -ая, -ое таралып (һибелеп, сәселеп, ыуалып) торған, һибелмә, ярмалы; **рассы́пчатая карто́шка** ярмалы картуф; **рассы́пчатая ка́ша** таралып торған бутҡа

**РАССЫХА́ТЬСЯ** *несов. см.* **рассо́хнуться**

**РАСТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **раста́ять**

**РАСТА́ЛКИВАТЬ** *несов. см.* **растолка́ть**

**РАСТА́ЛКИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **раста́лкивать**

**РАСТА́ПЛИВАТЬ I** *несов. см.* **растопи́ть** I

**РАСТА́ПЛИВАТЬ II** *несов. см.* **растопи́ть** II

**РАСТА́ПЛИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **растопи́ться** I; **2.** *страд. от* **раста́пливать** I

**РАСТА́ПЛИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **растопи́ться** II; **2.** *страд. от* **раста́пливать** II

**РАСТА́ПТЫВАТЬ** *несов. см.* **растопта́ть**

**РАСТА́ПТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **растопта́ться 2.** *страд. от* **раста́птывать**

**РАСТАСКА́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **растащи́ть** 1

**РАСТА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **растащи́ть, растаска́ть**

**РАСТА́СКИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **раста́скивать**

**РАТЬ** *ж* **1.** *уст.* (*битва*) һуғыш, яу; **кровопроли́тная рать** ҡанлы һуғыш **2.** *трад.-поэт.* (*войско*) ғәскәр, сиреү, яу; **могу́чая рать** көслө ғәскәр **3.** *кого-чего, какая*; *перен., уст.* (*множество кого-л.*) (ҙур) төркөм; **рать ненави́стников** күрә алмаусылар төркөмө

**РА́УНД** *м*; *спорт.* раунд (*бокста*: *көрәш барған ваҡыт, ғәҙәттә, 3 минут була*); **четвёртый ра́унд** дүртенсе раунд

**РАФИНА́Д** *м* рафинад (*шаҡмаҡлы шәкәр*)

**РАФИНА́ДНЫЙ,** -ая, -ое рафинад ...ы; **рафина́дный заво́д** рафинад заводы

**РАФИНЁР** *м* (*машина*) рафинёр (*ҡағыҙ етештереүҙә ваҡлау өсөн ҡулланылған ҡорамал*)

**РАФИНЁРНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* **1.** таҙартыу ...ы, таҙарта торған; **рафинёрный цех** таҙартыу цехы **2.** (*подвергаемый рафинированию*) рафинадлау ...ы, рафинадлай торған; **рафинёрная ма́сса** рафинадлау массаһы

**РАФИНИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **рафини́ровать 2.** *прил.* таҙартылған, арындырылған, таҙа; **рафини́рованное ма́сло** таҙартылған май **3.** *прил.*; *перен., книжн.* (*изысканный*) нескә, нәзәкәтле; **рафини́рованный зри́тель** нәзәкәтле тамашасы

**РАФИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *спец.* **1.** таҙартыу, рафинирлау, арындырыу (*төрлө сит ҡатнашмаларҙан*); **рафини́ровать медь**

баҡырҙы таҙартыу **2.** рафинадлау; **рафини́ровать са́хар** шәкәрҙе рафинадлау

**РАФИНИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* таҙартыу ...ы, таҙарта торған; **рафиниро́вочная печь** таҙартыу мейесе

**РАХА́Т-ЛУКУ́М** *м* рәхәт-лоҡом (*татлы ризыҡ*)

**РАХИ́Т** *м*; *мед.* рахит, һула, өсйән, етейән, сиргәпәш (*балаларҙағы һөйәк ауырыуы*)

**РАХИТИ́ЗМ** *м* рахит (һула, өсйән, етейән) билдәләре

**РАХИ́ТИК** *м*; *разг.* рахит (һула, өсйән, етейән) менән ауырыусы

**РАХИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое рахит (өсйән, һула, етейән) ауырыулы, рахит (һула, өсйән) менән ауырыусы; **рахити́ческий ма́льчик** өсйән менән ауырыусы малай

**РАХИТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **рахити́ческий**

**РАЦИО́Н** *м* рацион (*билдәле ваҡытҡа әҙерләнгән аҙыҡ күләме һәм уның составы*); **су́точный рацио́н** тәүлек рационы; **соста́вить рацио́н** рацион төҙөү

**РАЦИОНАЛИЗА́ТОР** *м* рационализатор, уйлап табыусы, рационалләштереүсе

**РАЦИОНАЛИЗА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое рационализатор ...ы, рационализаторлыҡ ...ы; **рационализа́торское предложе́ние** рационализаторлыҡ тәҡдиме

**РАЦИОНАЛИЗА́ТОРСТВО** *с* рационализаторлыҡ; **разви́тие рационализа́торства** рационализаторлыҡтың үҫеше

**РАЦИОНАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* рациональ итеү, камиллаштырыу, яҡшыртыу, рационализация; **рационализа́ция проце́ссов произво́дства** етештереү процестарын камиллаштырыу

**РАЦИОНАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* рационалләштереү, камиллаштырыу, яҡшыртыу; **рационализи́ровать техноло́гию** технологияны камиллаштырыу

**РАЦИОНАЛИЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **рационализи́ровать**

**РАЦИОНАЛИ́ЗМ** *м* рационализм (**1.** *танып белеү процесында аҡыл һәләтен берҙән-бер сығанаҡ тип иҫәпләгән, был процеста тәжрибә менән һиҙемдең әһәмиәтен баһалап еткермәгән йәки бөтөнләй кире ҡаҡҡан фәлсәфә йүнәлеше* **2.** *тормошта, ғәҙәт-холоҡта аҡыл эшмәкәрлеген тойғоларҙан айырып ҡараған һәм өҫтөн ҡуйған ҡараш*); **францу́зский рационали́зм** француз рационализмы

**РАЦИОНАЛИ́СТ** *м* и **РАЦИОНАЛИ́СТКА** *ж* рационалист (**1.** *рационализм яҡлы кеше* **2.** *аҡыллы кеше*)

**РАЦИОНАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** рационалистик, рационализмға нигеҙләнгән, рационализм ...ы **2.** рационалистик, аҡыллы, нигеҙле, рациональ; **рационалисти́ческое сужде́ние** рациональ фекер йөрөтөү

**РАЦИОНА́ЛЬНОСТЬ** *ж* рационаллек, үлсәп (аҡыллы) эш итеү, үлсәнгәнлек; **рациона́льность мероприя́тий** сараларҙың рационаллеге; **рациона́льность техноло́гии** технологияның үлсәнгәнлеге

**РАЦИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **рационалисти́ческий** 1; **рациона́льная филосо́фия** рационализмға нигеҙләнгән фәлсәфә **2.** рациональ, аҡыллы, төплө, урынлы, нигеҙле; **рациона́льное испо́льзование свои́х сил** үҙ көсөңдө рациональ файҙаланыу; **рациона́льное испо́льзование рабо́чей си́лы** эшсе көстәрҙе урынлы файҙаланыу **3.** *мат.* рациональ; **рациона́льное число́** рациональ һан

**РАЦИОНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что; спец.* (*установить определённый рацион*) рационлау, рацион билдәләү (индереү)

**РА́ЦИЯ** *ж* рация (*күсмә радиостанция*)

**РА́ЧИЙ,** -ья, -ье **1.** ҡыҫала ...ы; **ра́чья клешня́** ҡыҫала ҡыҫҡысы **2.** (*свойственный раку*) ҡыҫала һымаҡ, ҡыҫаланыҡы кеүек (төҫлө); **вы́пуклые ра́чьи глаза́** ҡыҫаланыҡы кеүек аҡыш күҙҙәр

**РАЧИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ҡайғыртыусан, хәстәрлек, хәстәрлелек; **рачи́тельность хозя́ина** хужаның хәстәрлелеге

**РАЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*старательный*) ҡайғыртыусан, хәстәрле, тырыш; **рачи́тельный рабо́тник** тырыш эшсе **2.** (*хозяйственный*) һаҡсыл, хужалыҡсыл; **рачи́тельное испо́льзование госуда́рственных средств** хөкүмәт милкен һаҡсыл тотоноу; **рачи́тельное отноше́ние** хужалыҡсыл мөнәсәбәт

**РА́ШПИЛЬ** *м* рашпиль (*эре тешле игәү*)

**РВАНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, за что* ҡапыл (кинәт) тартыу; **рвану́ть дверь** ишекте ҡапыл тартыу **2.** *что; прост.* эләктереү, эләктереп ҡалыу, ҡулға төшөрөү; **рвану́ть изря́дный куш** байтаҡ ҡына өлөш эләктереү **3.** *разг.* ҡапыл (кинәт) ҡуҙғалыу (ташланыу, атылыу); **ло́шади рвану́ли** аттар ҡапыл ҡуҙғалды **4.** *прост.* (ҡапыл) сығып китеү; **рвану́ть в Москву́** ҡапыл Мәскәүгә сығып китеү **5.** *прост.* елкенеп (өҙҙөрөп, ашҡынып) эшләп (башҡарып) ебәреү; **гармони́ст рвану́л плясову́ю** гармунсы өҙҙөрөп бейеү көйөн уйнап ебәрҙе **6.** *что обычно безл.; разг.* шартлатыу, шартлау; **что́-то си́льно рвану́ло** ниҙер бик ҡаты шартланы

**РВАНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡапыл (кинәт) ҡуҙғалып китеү, ырғылыу, атылыу, ташланыу; **маши́на рвану́лась с ме́ста** машина урынынан ҡапыл ҡуҙғалып китте **2.** *разг.* шартлау; **грана́ты рвану́лись** гранаталар шартланы

**РВА́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*разорванный на части*) өҙөлгән, өҙөлөп бөткән, өҙөк; **рва́ные провода́** өҙөк сымдар **2.** (*прорванный*) йыртыҡ, йыртылған, йыртылып бөткән, алама; **рва́ная оде́жда** йыртылып бөткән кейем **3.** *мед.* (*неров-*

*ный*) өҙгөләнгән, йыртҡыланған; **рва́ная ра́на** өҙгөләнгән яра

**РВАНЬ** *ж собир.* **1.** *разг.* йыртыҡ (алама, йыртыҡ-бортоҡ) кейем (аяҡ кейеме); **снять рвань** алама кейемде сисеп ташлау **2.** *прост.* (*оборванцы*) ярлы-ябаға, ярлы-ялпы, йолҡоштар **3.** *спец.* (*рваные остатки ниток и т.п.*) өҙөк, өҙөк-өҙөк, ҡалдыҡ-боҫтоҡ (*еп, сүс һ.б. ҡалдығы*)

**РВАНЬЁ** *с*; *разг.* **1.** *см.* **рвать** I 1; **2.** *собир. см.* **рвань** 1; **носи́ть рваньё** алама кейем кейеү

**РВАТЬ I** *несов. что* **1.** йыртыу, өҙөү, өҙгөләү; **рвать письмо́** хатты йыртыу **2.** *перен.* өҙөү, бөтөрөү, туҡтатыу; **рвать отноше́ния** мөнәсәбәттәрҙе өҙөү **3.** шартлатыу; **рвать дина-ми́том** динамит менән шартлатыу **4.** өҙгөләү, тартҡылау, тартып (йолҡоп) алыу; **ве́тер рвал по́лы тулу́па** ел толоп сабыуын тартҡылай **5.** өҙөү, йолҡоу, тиреү; **рвать ви́шню** сейә тиреү; **рвать цветы́** сәскә өҙөү **6.** *перен.*, *прост.* әләктереү, ҡулға төшөрөү; **рвать куш** ҙур өлөш әләктереү **7.** *безл.*; *разг.* (*о жгучей боли*) ныҡ һыҙлау (ауыртыу) ♦ **рвать зуб (зу́бы)** теш һурыу; **рвать на себе́ во́лосы** *см.* **во́лос**; **рвать на ча́сти** *см.* **часть**; **рвать и мета́ть** туҙыныу, пыран-заран килтереү; **с рука́ми рвать** тиҙ арала алып бөтөү

**РВАТЬ II** *несов. кого безл.*, *разг.* ҡоҫтороу, ҡоҫоу; **больно́го рвёт** ауырыу ҡоҫа

**РВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** йыртылыу; **бума́га рвёт-ся** ҡағыҙ йыртыла; **о́бувь рвётся** аяҡ кейеме йыртыла **2.** өҙөлөү, туҡталыу; **рвала́сь пос-ле́дняя связь** һуңғы бәйләнеш өҙөлдө **3.** шартлау, ярылыу; **ми́ны рву́тся** миналар шартлай **4.** ысҡынырға тырышыу; **соба́ка рвётся с цепи́** эт сынйырҙан ысҡынырға тырыша **5.** атлығыу, ашҡыныу, ынтылыу; **рва́ться в бой** һуғышҡа атлығыу; **рва́ться к вла́сти** хакимлыҡҡа ынтылыу **6.** *страд. от* **рвать** I 1–6 ♦ **се́рдце (душа́) рвёт-ся (на ча́сти)** йөрәк өҙгөләнә (телгеләнә)

**РВАЧ** *м*; *разг.*, *неодобр.* өҙгөс, йолҡҡос; **быть рвачо́м** өҙгөс булыу

**РВА́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *разг.*, *неодобр.* өҙгөс ...ы, өҙгөслөк ...ы; **рва́ческие накло́нности** өҙгөслөк ғәҙәттәре

**РВА́ЧЕСТВО** *с*; *разг. неодобр.*, өҙгөслөк, йолҡҡослоҡ; **борьба́ с рва́чеством** өҙгөслөк менән көрәш

**РВЕ́НИЕ** *с* атлығыу, ашҡыныу, атылыу, тырышлыҡ; **с рве́нием бра́ться за рабо́ту** эшкә атлығып тотоноу

**РВО́ТА** *ж* **1.** ҡоҫоу; **му́читься рво́той** ҡоҫоуҙан яфаланыу **2.** ҡоҫоҡ, ҡоҫҡолоҡ

**РВО́ТНЫЙ,** -ая, -ое ҡоҫторғос, ҡоҫтора торған; **рво́тное сре́дство** ҡоҫторғос дарыу

**РДЕСТ** *м* һыу үләне (ебәге, йөнө); **рдест пла́вающий** йөҙөүсе һыу ебәге, һыу кәбеҫтәһе; **рдест удлинённый** оҙонса һыу ебәге

**РДЕТЬ** *несов.* ҡыҙарыу, алһыуланыу, алланыу, ал (ҡыҙыл) төҫкә инеү; **рде́ет вече́рняя заря́** (киске) шәфәҡ ҡыҙара; **рде́ет ряби́на** миләш аллана; **у́ши рде́ют** ҡолаҡтар ҡыҙара

**РДЕ́ТЬСЯ** *несов. см.* **рдеть**

**РДЯ́НЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыл, ал; **рдя́ные ли́стья** ҡыҙыл япраҡтар

**РЕ** *с нескл.*; *муз.* ре (*музыка гаммаһында икенсе нота*)

**РЕ...** *приставка*; *исем, ҡылым яһағында ҡулланылып, түбәндәге мәғәнәләрҙе аңлата*: 1) *эш-хәрәкәттең ҡабатлап йәки ҡабатҡабат башҡарылыуын, мәҫ.*, **ремилитариза́ция** яңынан ҡоралландырыу; 2) *ҡапма-ҡаршы эшхәрәкәтте, мәҫ.*, **реэвакуа́ция** эвакуациянан ҡайтарыу

**РЕАБИЛИТА́ЦИЯ** *ж* **1.** аҡлау, реабилитациялау; **по́лная реабилита́ция** тулыһынса аҡлау **2.** хоҡуғын кире ҡайтарыу, реабилитациялау **3.** *мед.* реабилитациялау, тергеҙеү (*организм эшсәнлеген тергеҙеүгә йүнәлтелгән медицина, социаль, педагогик саралар комплексы*); **трудо-ва́я реабилита́ция** хеҙмәткә яраҡлылыҡты реабилитациялау

**РЕАБИЛИТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* **1.** аҡлау, реабилитациялау; **реабилити́ровать своё до́брое и́мя** үҙеңдең яҡшы исемеңде аҡлау **2.** (*восстановить в правах*) хоҡуҡты кире ҡайтарыу, реабилитациялау

**РЕАБИЛИТИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов.*, *несов.* аҡланыу, реабилитацияланыу **2.** *только несов. страд. от* **реабилити́ровать**

**РЕАГЕ́НТ** *м*; *хим.* реагент (*химик реакцияла ҡатнашҡан матдә*)

**РЕАГИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *на что* (*отвечать на какое-л. физическое раздражение*) һиҙеү, тойоу, тышҡы тәьҫиргә яуап биреү, әҫәрләнеү, йоғонтоға бирелеү; **глаз норма́льно реаги́рует на свет** күҙ яҡтылыҡты һәйбәт һиҙә **2.** *на что* (*проявлять какое-л. отношение к кому-чему-л.*) иғтибар итеү, яуап биреү, үҙ ҡарашын белдереү; **реаги́ровать на предложе́ния докла́дчика** докладсының тәҡдимдәренә иғтибар итеү **3.** *хим.* реакцияға инеү

**РЕАКТИ́В** *м*; *хим.* реактив (*берәй матдә менән билдәле бер реакцияға инеп, шул составта нимәнеңдер барлығын билдәләү мөмкинлеген биргән матдә*)

**РЕАКТИ́ВНОСТЬ** *ж* **1.** *хим.* реактивлыҡ **2.** *биол.* тәьҫиргә яуап биреү һәләтлеге, реактивлыҡ; **реакти́вность органи́зма** организмдың реактивлығы

**РЕАКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *хим.* реактив; **ре-акти́вные вещества́** реактив матдәләр **2.** *биол.* тәьҫиргә яуап биреүсән (бирә торған), реактив; **реакти́вное состоя́ние** реактив хәл **3.** *физ.* реактив (*атылып сығыусы газдар ярҙамында хәрәкәт итә торған*); **реакти́вный самолёт** реактив самолёт

**РЕА́КТОР** *м* реактор (**1.** *эл. ҡыҫҡа ялғаныш тоғының көсөн сикләү һәм үҙгәрешле ток*

*теҙмәһендә тейешле көсөргәнеште тотоу өсөн хеҙмәт иткән электр аппараты* **2.** *хим. химик реакцияны билдәле температура һәм баҫым шарттарында тотоу өсөн хеҙмәт иткән аппарат* **3.** *физ. атом ядроһының сынйырлы бүленеү реакцияһын башҡара торған ҡоролма)*

**РЕАКЦИОНЕ́Р** *м* и **РЕАКЦИОНЕ́РКА** *ж* реакционер (*иҫке ҡарашлы кеше*)

**РЕАКЦИО́ННОСТЬ** *ж* реакцион булыу, яңылыҡҡа ҡаршылыҡ; **реакцио́нность взгля́дов** ҡараштарҙың яңылыҡҡа ҡаршылығы; **реакцио́нность поли́тики** сәйәсәттең реакцион булыуы

**РЕАКЦИО́ННЫЙ I,** -ая, -ое *хим.* реакция ...ы; **реакцио́нная спосо́бность кислоро́да** кислородтың реакция һәләтлеге; **реакцио́нная ко́лба** реакция колбаһы

**РЕАКЦИО́ННЫЙ II,** -ая, -ое реакцион, яңылыҡҡа ҡаршы, иҫкелек яҡлы; **реакцио́нная идеоло́гия** иҫкелек яҡлы идеология

**РЕА́КЦИЯ I** *ж* **1.** реакция, реакция яһау, яуап; **реа́кция зри́теля** тамашасылар реакцияһы; **реа́кция органи́зма на хо́лод** организмдың һалҡынға реакцияһы **2.** (*упадок, слабость после напряжения*) реакция, хәлһеҙлек, хәлһеҙләнеү; **реа́кция по́сле си́льного возбужде́ния** көслө тәьҫирләнеүҙән һуң хәлһеҙләнеү **3.** реакция; **хими́ческая реа́кция** химик реакция; **реа́кция опо́ры** *физ.* таяныс реакцияһы ♦ **цепны́е реа́кции** *см.* **цепно́й**

**РЕА́КЦИЯ II** *ж* реакция (*еңелгән иҫке көстәрҙең төрлө ижтимағи прогресты үҙҙәренең хоҡуҡтарын һәм сәйәси хакимлығын һаҡлау, кире ҡайтарыу маҡсатында баҫыу, ҡыҫыу сәйәсәте; яңылыҡтың үҫеүенә арҡыры торған һәр төрлө ҡаршылыҡ, ҡаршы көс*); **го́ды реа́кции** реакция йылдары; **полити́ческая реа́кция** сәйәси реакция

**РЕА́Л** *м*; *полигр.* реал (*хәреф йыйыу кассалары һәм йыйылған хәрефтәрҙе һаҡлай торған өҫтәл-шкаф*)

**РЕАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** тормошҡа ашырыу; **реализа́ция пла́на** планды тормошҡа ашырыу **2.** (*обращение имущества и т.п. в деньги*) һатыу, аҡсаға әйләндереү; **реализа́ция проду́кции** продукция һатыу

**РЕАЛИ́ЗМ** *м* **1.** реализм, реаллек, реаль ҡараш; **реали́зм в плани́ровании** планлаштырыуҙағы реаллек **2.** (*направление в литературе и искусстве*) реализм; **реали́зм в иску́сстве** сәнғәттәге реализм **3.** *филос.* реализм ♦ **крити́ческий реали́зм** критик реализм (*XIX—XX бб. әҙәбиәттәге, сәнғәттәге йүнәлеш*)

**РЕАЛИЗОВА́ТЬ** *сов., несов.* **1.** *что* тормошҡа (ғәмәлгә, эшкә, бойомға) ашырыу, үтәү, реалләштереү; **реализова́ть все пла́ны** бөтә пландарҙы тормошҡа ашырыу **2.** һатыу, аҡсаға әйләндереү; **реализова́ть това́р** тауар һатыу

**РЕАЛИЗОВА́ТЬСЯ 1.** *сов., несов.* тормошҡа (ғәмәлгә, эшкә, бойомға) ашыу; **план реализу́ется** план тормошҡа аша **2.** *сов., несов.* аҡсаға әйләнеү, һатылыу; **това́р реализу́ется** тауар һатыла **3.** *только несов. страд. от* **реализова́ть**

**РЕАЛИ́СТ** *м* реалист (**1.** *ысын тормош шарттарын иҫәпкә алып эш иткән кеше* **2.** *реализм юлында торған кеше* **3.** *реализмды яҡлаған кеше* **4.** *иҫк. реаль училище уҡыусыһы*)

**РЕАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** реалистик; **реалисти́ческие сужде́ния** реалистик фекерҙәр **2.** тормошсан, реалистик, реализм ...ы; **реалисти́ческое произведе́ние** тормошсан әҫәр

**РЕАЛИСТИ́ЧНОСТЬ** *ж* реаллек, реаль булыу, тормошсанлыҡ

**РЕАЛИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **реалисти́ческий**

**РЕА́ЛИЯ** *ж* реаль нәмәләр

**РЕА́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** (*действительность*) ысынбарлыҡ; **объекти́вная реа́льность** объектив ысынбарлыҡ **2.** реаллек, ысынлыҡ, ысын булыу; **реа́льность поли́тики** сәйәсәттең реаллеге; **реа́льность предложе́ний** тәҡдимдәрҙең реаллеге

**РЕА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*действительный*) реаль, ысын, ысынбарлыҡта булған; **реа́льная действи́тельность** реаль ысынбарлыҡ; **реа́льная обстано́вка** реаль хәл **2.** (*настоящий*) ысын, дөрөҫ, реаль; **реа́льная осно́ва** дөрөҫ нигеҙ **3.** реаль, тормошҡа ашырлыҡ, тормошсан; **реа́льный взгляд** тормошсан ҡараш; **реа́льная зада́ча** тормошҡа ашырлыҡ бурыс; **реа́льная поли́тика** реаль сәйәсәт ♦ **реа́льная за́работная пла́та** реаль эш хаҡы; **реа́льное учи́лище** *ист.* реаль училище (*уҡыу планында күбеһенсә тәбиғәт һәм математика фәндәре булған революцияға тиклем Рәсәйҙәге уҡыу йорто*)

**РЕАНИМАТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое реаниматология ...ы; **реаниматологи́ческий кабине́т** реаниматология кабинеты

**РЕАНИМАТОЛО́ГИЯ** *ж* реаниматология (*медицинаның реанимация менән шөғөлләнә торған бүлеге*)

**РЕАНИМАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое реанимация ...ы, реанимацион; **реанимацио́нные ме́ры** реанимацион саралар; **реанимацио́нное отделе́ние** реанимация бүлеге

**РЕАНИМА́ЦИЯ** *ж* реанимация (*клиник үлем хәлендәге кешеләрҙең иң мөһим йәшәү ағзаларын тергеҙеү өсөн үткәрелгән саралар*)

**РЕБЁНОК** *м* бала, бәпес, сабый; **грудно́й ребёнок** имсәк бала; **здоро́вый ребёнок** һау бала; **он совсе́м ещё ребёнок** ул әле бала ғына

**РЕБЁНОЧЕК** *м* балаҡай

**РЁБЕРНЫЙ,** -ая, -ое ҡабырға ...ы; **рёберные ко́сти** ҡабырға һөйәктәре; **рёберный перело́м** ҡабырға һыныуы

**РЕБРИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡабырғаһы сығып торған; **ребри́стый конь** ҡабырғалары сығып торған ат **2.** (*неровный, с выступами*) ҡытыр-

шы, йырмасланған; **ребри́стая пове́рхность** ҡытыршы яҫылыҡ

**РЕБРО́** *с* **1.** ҡабырға; **и́стинные рёбра** ысын ҡабырғалар; **коле́блющиеся рёбра** ирекле ҡабырғалар; **поясни́чное ребро́** бил ҡабырғаһы **2.** (*узкий край или сторона чего-л.*) ҡабырға, ҡыр, ян; **ребро́ доски́** таҡтаның ҡыры; **поста́вить я́щик на ребро́** йәшникте ҡабырғаһына ҡуйыу **3.** *мат.* ҡабырға, ҡыр (*ике яҫылыҡтың киҫешеү һыҙығы*); **ребро́ пирами́ды** пирамиданың ҡабырғаһы ♦ **пересчита́ть рёбра** *кому* кемдең ҡабырғаһын һанау; **поста́вить вопро́с ребро́м** мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйыу

**РЁБРЫШКО** *с* бәләкәй ҡабырға

**РЕ́БУС** *м* **1.** ребус, башватҡыс, һүҙ табышмағы; **реша́ть ре́бус** ребус сисеү **2.** *перен.* (*что-л. непонятное*) буталсыҡ, аңлайышһыҙ нәмә, ребус

**РЕ́БУСНЫЙ,** -ая, -ое буталсыҡ, аңлайышһыҙ

**РЕБЯ́ТА** *мн.* **1.** *см.* **ребёнок** **2.** *разг.* (*молодые люди*) егеттәр, егет-елән, йәш-елкенсәк

**РЕБЯ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **ребя́чий**

**РЕБЯ́ЧЕСТВО** *с* (*детство*) балалыҡ, сабыйлыҡ; **впасть в ребя́чество** балалыҡҡа ҡайтыу

**РЕБЯ́ЧИЙ,** -ья, -ье *разг.* **1.** бала ...ы, сабый ...ы; **ребя́чий го́лос** бала тауышы; **ребя́чья душа́** бала күңеле **2.** *перен.* балаларса, сабыйҙарса, бала-саға кеүек, балаларға (сабыйҙарға) хас; **ребя́чий посту́пок** балаларға хас ҡылыҡ

**РЕБЯ́ЧИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* балаланыу, бала-сағаланыу, балаларса ҡыланыу, үҙеңде сабыйҙарса тотоу, сабыйланыу

**РЕБЯ́ЧЛИВЫЙ,** -ая, -ое балаларға хас, балаларса шуҡ (шаян), балаларса ҡыланыу; **ребя́чливое настрое́ние** балаларса шаян кәйеф

**РЁВ** *м* **1.** олоу, үкереү; **медве́жий рёв** айыу үкереүе **2.** (*громкий крик человека, людей*) ҡысҡырыш, көслө шау-шыу; **в за́ле разда́лся рёв** залда көслө шау-шыу ишетелде **3.** олоу, ыжғырыу, геүләү, гөрһөлдәү; **рёв мото́ров** моторҙар геүләүе **4.** *разг.* (*громкий плач*) үкереп (олоп, ҡысҡырып, аҡырып) илау; **де́ти по́дняли рёв** балалар ҡысҡырып илай башланы

**РЁВА** *м* и *ж*; *разг.* илаҡ; **в де́тстве она́ была́ рёвой** бала саҡта ул илаҡ булды

**РЕВАЛЬВА́ЦИЯ** *ж* ревальвация (*аҡсаның ҡиммәтләнеүе*)

**РЕВАЛЬВИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *что* ревальвация, ревальвация яһау (*аҡсаны ҡиммәтләтеү*); **ревальви́ровать рубль** һумды ревальвациялау

**РЕВА́НШ** *м* реванш (*һуғышта, көрәштә еңелгәндең ҡонон ҡайтарыу*); **взять рева́нш** реванш алыу; **дать рева́нш** реванш биреү

**РЕВАНШИ́ЗМ** *м* реваншизм (*һуғышта еңелгәндән һуң кире өҫтөнлөк алырға булған ынтылыш; реванш алыу маҡсатында яңы һуғыш асыуға йүнәлтелгән сәйәсәт*)

**РЕВАНШИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* реванш алыу

**РЕВАНШИ́СТ** *м* реваншист (*реваншизм яҡлы кеше*); **поли́тика реванши́стов** реваншистар сәйәсәте

**РЕВАНШИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое реваншис(тар) ...ы, реваншизм ...ы; **реванши́стская поли́тика** реваншизм сәйәсәте

**РЕВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое ревень ...ы; **реве́нный лист** ревень япрағы; **реве́нное варе́нье** ревень ҡайнатмаһы

**РЕВЕ́НЬ** *м* ревень

**РЕВЕРА́НС** *м* реверанс (*теҙ сүгеп сәләм биреү*)

**РЕ́ВЕРС** *м*; *спец.* реверс (**1.** *миҙал йәки аҡсаның артҡы яғы* **2.** *аҡса менән тәьмин итеп ҡуйыу* **3.** *машинаның хәрәкәт йүнәлешен кире яҡҡа үҙгәртеүсе механизм* **4.** *ҡара* **реверси́рование**)

**РЕВЕРСИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* кире, артҡа табан, йүнәлешен үҙгәртә торған, реверсив; **реверси́вное движе́ние** кире хәрәкәт; **реверси́вный дви́гатель** реверсив двигатель

**РЕВЕРСИ́РОВАНИЕ** *с*; *тех.* йүнәлеш үҙгәртеү

**РЕВЕ́РСИЯ** *ж*; *биол.* (*атавизм*) реверсия (*тереклектәрҙә алыҫ тоҡом-ырыуында булған, ләкин яҡынырaҡ быуындарҙа булмаған ҡайһы бер билдәләрҙең килеп сығыу күренеше*)

**РЕВЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*о животных*) олоу, үкереү; **бык ревёт** үгеҙ үкерә **2.** (*громко петь, кричать*) аҡырыу, ҡысҡырыу **3.** олоу, ыжғырыу, геүләү, гөрһөлдәү; **вью́га ревёт** буран ыжғыра **4.** *разг.* үкереп (олоп, аҡырып, ҡысҡырып) илау; **де́ти реве́ли** балалар аҡырып иланы ♦ **реве́ть белу́гой** аҡырыу, аҡырып илау

**РЕВИЗИОНИ́ЗМ** *м* ревизионизм; **ру́сский ревизиони́зм** урыҫ ревизионизмы

**РЕВИЗИОНИ́СТ** *м* ревизионист (*ревизионизмды яҡлаусы*)

**РЕВИЗИОНИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое ревизионизм ...ы, ревизионистик; **ревизиони́стская пози́ция** ревизионистик позиция; **ревизиони́стская поли́тика** ревизионизм сәйәсәте

**РЕВИЗИО́ННЫЙ,** -ая, -ое ревизия ...ы, тикшереү ...ы; **ревизио́нная коми́ссия** ревизия комиссияһы

**РЕВИ́ЗИЯ** *ж* **1.** ревизия, тикшереү; **годова́я реви́зия** йыллыҡ ревизия **2.** (*пересмотр чего-л.*) ревизиялау, яңынан ҡарау; **реви́зия реше́ний** ҡарарҙарҙы яңынан ҡарау **3.** иҫәп (һан) алыу, рәүиз (*XVIII—XIX бб. Рәсәйҙә һалым һалыу өсөн халыҡ иҫәбен алыу*); **после́дняя реви́зия** һуңғы иҫәп алыу, һуңғы рәүиз

**РЕВИЗОВА́ТЬ** *сов.*, *несов.* *кого-что* **1.** ревизия яһау, тикшереү; **ревизова́ть ка́ссу** кассаны тикшереү **2.** (*пересмотреть*) яңынан ҡарау, ревизия яһау; **ревизова́ть поли́тику** сәйәсәтте яңынан ҡарау

**РЕВИЗОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **ревизова́ть**

**РЕВИЗО́Р** *м* **1.** ревизор, тикшереүсе; **до́лжность ревизо́ра** ревизор вазифаһы **2.** ревизор (*тимер юл контролёры*)

**РЕВИЗО́РСКИЙ,** -ая, -ое ревизор ...ы, ревизорлыҡ ...ы; **ревизо́рские обя́занности** ревизор бурыстары

**РЕВИ́ЗСКИЙ,** -ая, -ое *уст.* рәүиз ...ы ♦ **реви́зская душа́** рәүиз берәмеге (*XVIII—XIX бб. Рәсәйҙә ир-аттарҙы иҫәпләү берәмеге*); **реви́зские ска́зки** рәүиз мәғлүмәттәре (*XVIII—XIX бб. Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алған исемлек*)

**РЕВКО́М** *м*; *ист.* (*революционный комитет*) ревком (*революцион комитет*)

**РЕВМАТИ́ЗМ** *м* ревматизм; **хрони́ческий ревмати́зм** хроник (дауамлы) ревматизм

**РЕВМА́ТИК** *м*; *разг.* ревматик (*ревматизм менән ауырыусы кеше*)

**РЕВМАТИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ревматизм ...ы; **ревмати́ческие бо́ли** ревматизм һыҙланыуҙары

**РЕВНИ́ВЕЦ** *м* и **РЕВНИ́ВИЦА** *ж*; *разг.* көнсөл (көнләшеүсән) кеше

**РЕВНИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* көнсөл, көнләшеүсән; **ревни́вый муж** көнсөл ир; **быть ревни́вым** көнсөл булыу

**РЕВНИ́ТЕЛЬ** *м* и **РЕВНИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж*; *книжн.* ҡайғыртыусы, көрәшеүсе, яҡлаусы; **ревни́тель поря́дка** тәртип өсөн көрәшеүсе; **ревни́тель чистоты́ языка́** тел сафлығын яҡлаусы

**РЕВНОВА́ТЬ** *несов. кого-что* и *без доп.* көнләү, көнләшеү; **ревнова́ть му́жа** ирҙе көнләшеү

**РЕ́ВНОСТНЫЙ,** -ая, -ое бик тырыш, ихлас, ысын күңелдән; **ре́вностный цени́тель иску́сства** сәнғәтте ихлас баһалаусы

**РЕ́ВНОСТЬ** *ж* **1.** көнсөллөк, көнләшеү; **проявля́ть ре́вность** көнсөллөк күрһәтеү **2.** *уст.* (*усердие в работе*) тырышлыҡ, ихласлыҡ; **ре́вность к де́лу** эшкә ихласлыҡ

**РЕВОЛЬВЕ́Р** *м* револьвер, алтатар; **кобура́ револьве́ра** алтатар ҡабы

**РЕВОЛЬВЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое револьвер ...ы, алтатар ...ы; **револьве́рный вы́стрел** револьверҙан атыу ♦ **револьве́рный стано́к** револьверлы станок (*башы әйләнеп торған ҡырыу станогы*)

**РЕВОЛЬВЕ́РЩИК** *м* и **РЕВОЛЬВЕ́РЩИЦА** *ж* ҡырыу станогында эшләүсе, ҡырыусы (*револьвер станогында эшләүсе токарь*)

**РЕВОЛЮЦИОНЕ́Р** *м* и **РЕВОЛЮЦИОНЕ́РКА** *ж* революционер, инҡилапсы (**1.** *революцияла ҡатнашыусы* **2.** *фәндә, техникала, сәнғәттә һ.б. һынылыш индергән кеше*); **революционе́р в нау́ке** фәндәге революционер

**РЕВОЛЮЦИОНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** *кого-что* революционлаштырыу; **революционизи́ровать ма́ссы** массаларҙы революционлаштырыу **2.** (*преобразовать в корне*) нигеҙенән (тамырынан) үҙгәртеү; **революционизи́ровать иску́сство теа́тра** театр сәнғәтен нигеҙенән үҙгәртеү

**РЕВОЛЮЦИОНИЗИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* революционлашыу **2.** *только несов. страд. от* **революционизи́ровать**

**РЕВОЛЮЦИО́ННОСТЬ** *ж* революционлыҡ; **революцио́нность взгля́дов** ҡараштарҙың революционлығы

**РЕВОЛЮЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое революцион, революция ...ы, инҡилап ...ы; **революцио́нное движе́ние** революция хәрәкәте; **революцио́нная пе́сня** революцион йыр; **революцио́нное разви́тие** революцион үҫеш

**РЕВОЛЮ́ЦИЯ** *ж*; *в разн. знач.* революция, инҡилап; **культу́рная револю́ция** мәҙәниәт революцияһы; **револю́ция в те́хнике** техникалағы революция; **соверши́ть револю́цию** революция яһау

**РЕВТРИБУНА́Л** *м*; *ист.* (*революционный трибунал*) ревтрибунал (*революция трибуналы*)

**РЕВУ́Н** *м* **1.** *разг.* илаҡ **2.** *мор.* сирена; **поста́вить реву́н** сирена ҡуйыу **3.** баҡраҡ маймыл (*Көньяҡ һәм Үҙәк Америкала йәшәүсе оҙон ҡойроҡло, көслө тауышлы маймыл*)

**РЕВУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* илаҡ

**РЕВЮ́** *с нескл.* ревю (*актуаль темаға ҡараған эстрада постановкаһы*)

**РЕГА́ЛИЯ** *ж*; *обычно мн.* **рега́лии** регалиялар (**1.** *монарх власының символы булып торған нәмәләр* **2.** *наградалар, орден, миҙалдар* **3.** *королдәрҙең ҡайһы бер килемдәрҙән* (*аҡса һуғыуҙан, рудник эшкәртеүҙән*) *өлөш алыу өсөн булған өҫтөнлөклө хоҡуғы*)

**РЕГА́ТА** *ж*; *спорт.* регата (*ишкәкле, елкәнле, моторлы кәмәләрҙә ярыш*)

**РЕ́ГБИ** *с нескл.*; *спорт.* регби (*футбол төрө*)

**РЕГБИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое регби ...ы, регби буйынса; **регби́йный чемпиона́т** регби буйынса чемпионат; **регби́йное по́ле** регби майҙаны

**РЕГБИ́СТ** *м*; *спорт.* регбисы (*регбиҙа уйнаусы*)

**РЕГЕНЕРА́Т** *м*; *тех.* регенерат (*файҙаланылғандан һуң кире элекке сифатына ҡайтарылған төрлө нәмә*)

**РЕГЕНЕРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* регенератив; **регенерати́вный цикл** регенератив цикл

**РЕГЕНЕРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* регенерат ...ы; **регенера́тный цех** регенерат цехы

**РЕГЕНЕРА́ТОР** *м* регенератор (*регенератив мейестәрҙә килгән һауаны, газды йылытыу өсөн хеҙмәт иткән камера һымаҡ төп өлөшө*)

**РЕГЕНЕРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* регенерация ...ы, регенерацион; **регенерацио́нная устано́вка** регенерация йайланмаһы; **регенерацио́нный проце́сс** регенерация процесы

**РЕГЕНЕРА́ЦИЯ** *ж* регенерация (**1.** *тех. тотонолған материалды билдәле операциялар аша ҡабаттан файҙаланыу өсөн тәүге хәленә*

*ҡайтарыу* **2.** *тех. мейескә килгән газ йәки һауаның шул уҡ мейестә янған материал йылыһы иҫәбенә йылытылыуы* **3.** *биол. организмда өҙөлгән, зыянланған ағзаның, туҡыманың, күҙәнәктең яңынан тәүге хәленә ҡайтыуы һәм бер өлөштән организмдың яңынан үҫеүе)*

**РЕГЕНЕРИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** регенерациялау, регенерация яһау; **регенери́ровать питьеву́ю во́ду** *тех.* эсәр һыуҙы регенерациялау; **регенери́ровать тка́ни органи́зма** *биол., мед.* организм туҡымаһын регенерациялау **2.** *биол.* регенерацияланыу; **кле́тки регенери́ровали** күҙәнәктәр регенерацияланған

**РЕ́ГЕНТ** *м* регент (**1.** *монарх урынына юғары дәүләт власын тотҡан ваҡытлы хаким* **2.** *хорҙағы (күберәк сиркәү хорында) дирижёр)*

**РЕ́ГЕНТСТВО** *с* регентлыҡ (**1.** *монарх урынына ваҡытлыса идара итеү* **2.** *сиркәүҙә дирижёрлыҡ итеү)*

**РЕГИО́Н** *м* регион, төбәк; **Сиби́рский регио́н Росси́и** Рәсәйҙең Себер регионы

**РЕГИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое региональ, төбәк; **региона́льное совеща́ние** региональ кәңәшмә ♦ **региона́льное соглаше́ние**; **региона́льный пакт** региональ килешеү, регионда төҙөлгән халыҡ-ара килешеү; **региона́льные це́ны** урындағы хаҡтар

**РЕГИ́СТР** *м* регистр (**1.** *исемлек, күрһәткес, теркәү кенәгәһе* **2.** *музыкаль инструменттың, тауыштың өн диапазонының билдәле урыны* **3.** *тынлы һәм баҫмаҡлы музыка ҡоралдарындағы бер үк приборҙағы бүлгес; регулятор* **4.** *бөтә караптар өҫтөнән техник күҙәтеү алып барған һәм уларға классификация үткәргән дәүләт органы)*

**РЕГИСТРА́ТОР** *м* регистратор (**1.** *теркәү үткәргән, яҙып алған кеше* **2.** *ниндәйҙер күренештәрҙе теркәп барған прибор* **3.** *ҡағыҙҙарҙы һаҡлау, теркәү өсөн тәғәйенләнгән беркетмәле папка)*

**РЕГИСТРА́ТОРША** *ж; разг.* регистратор (*теркәү үткәреүсе ҡатын-ҡыҙ)*

**РЕГИСТРАТУ́РА** *ж* регистратура (*ойошманың теркәү бүлеге)*

**РЕГИСТРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое регистрациялау, теркәү ...ы, регистрация ...ы; **регистрацио́нный лист** теркәү ҡағыҙы

**РЕГИСТРА́ЦИЯ** *ж см.* **регистри́ровать, регистри́роваться; регистра́ция депута́тов** депутаттарҙы теркәү

**РЕГИСТРИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* регистрациялау, теркәү, иҫәпкә алыу, теркәп ҡуйыу; **регистри́ровать докуме́нты** документтарҙы теркәп ҡуйыу

**РЕГИСТРИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** теркәлеү, яҙылыу, регистрацияланыу; **регистри́роваться кандида́том в депута́ты** депутатлыҡҡа кандидат итеп теркәлеү **2.** яҙылышыу, яҙылыу; **регистри́роваться в за́гсе** загста яҙылышыу **3.** *страд. от* **регистри́ровать**

**РЕГЛА́МЕНТ** *м* регламент; **установи́ть регла́мент** регламент билдәләү; **рабо́тать по регла́менту** регламент буйынса эшләү

**РЕГЛАМЕНТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* регламентлау, регламент ҡуйыу (билдәләү), тейешле ҡағиҙәләргә буйһондороу; **регламенти́ровать рабо́ту** эште регламентлау

**РЕГЛА́МЕНТНЫЙ,** -ая, -ое регламент ...ы; **регла́ментный поря́док** регламент тәртибе

**РЕГОЛИ́Т** *м; спец.* реголит (*айҙағы грунттың өҫкө ҡатлауы)*

**РЕГРЕ́СС** *м* **1.** регресс, артҡа китеш, тарҡалыш; **регре́сс в разви́тии** үҫештәге артҡа китеш **2.** *юр.* регресс

**РЕГРЕССИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое регрессив, артҡа һөйрәгән, регресҡа алып барған; **регресси́вная ассимиля́ция** регрессив ассимиляция; **регресси́вное движе́ние** регрессив хәрәкәт

**РЕГРЕССИ́РОВАТЬ** *несов.* артҡа китеү, бөтөүгә йүнәлеү, тарҡалыу; **регресси́ровать в разви́тии** үҫештә артҡа китеү

**РЕГРЕ́ССИЯ** *ж; мат.* регрессия (*уртаса дәүмәлдең башҡа дәүмәлдәр кимәленә бәйлелеге)*

**РЕГРЕ́ССНЫЙ,** -ая, -ое *юр.* регресс ...ы; **регре́ссный иск** регресс дәғүәһе

**РЕГУЛИ́РОВАТЬ** *несов.* көйләү, тәртипкә килтереү (һалыу), ҡағиҙәгә буйһондороу, яйлау; **регули́ровать ры́ночные це́ны** баҙар хаҡтарын көйләү; **регули́ровать движе́ние** хәрәкәтте тәртипкә һалыу; **регули́ровать мото́р** моторҙы көйләү

**РЕГУЛИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **регули́ровать**

**РЕГУЛИРО́ВКА** *ж см.* **регули́ровать; регулиро́вка движе́ния поездо́в** поездар хәрәкәтен көйләү; **регулиро́вка станка́** станок көйләү

**РЕГУЛИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое тәртипкә һалыу ...ы, көйләү ...ы, яйлау ...ы; **регулиро́вочный пост** көйләү посы

**РЕГУЛИРО́ВЩИК** *м* и **РЕГУЛИРО́ВЩИЦА** *ж* регулирлаусы, яйлаусы, көйләүсе; **регулиро́вщик у́личного движе́ния** урам хәрәкәтен көйләүсе

**РЕГУЛЯ́РНОСТЬ** *ж* ваҡытында булып тороу, даимилыҡ; **регуля́рность движе́ния поездо́в** поездар хәрәкәтенең даимилығы

**РЕГУЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** регуляр, даими, үҙ ваҡытында; **регуля́рное пита́ние** үҙ ваҡытында туҡланыу; **регуля́рная рабо́та** даими эш; **регуля́рное движе́ние тра́нспорта** транспорттың регуляр хәрәкәте **2.** регуляр, даими; **регуля́рная а́рмия** регуляр армия

**РЕГУЛЯ́ТОР** *м* **1.** көйләгес; **регуля́тор зву́ка** тауыш көйләгес; **регуля́тор ско́рости** тиҙлек көйләгес **2.** *перен., книжн.* (*то, что регулирует что-л.*) яйлаусы, яйға һалыусы (йүнәлдереүсе)

көс; **регуля́тор потребле́ния** ҡулланыуҙы яйға һалыусы

**РЕГУЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *спец*. регуляция, яйға һалыу; **гормона́льная регуля́ция** гормональ регуляция; **регуля́ция дыха́ния** тын алышты яйға һалыу

**РЕДАКТИ́РОВАНИЕ** *с см*. **редакти́ровать**; **редакти́рование журна́ла** журналды редакторлау; **редакти́рование статьи́** мәҡәләне редакторлау

**РЕДАКТИ́РОВАТЬ** *сов*., *несов*. *что* **1.** редакторлау, тикшереү, төҙәтеү; **редакти́ровать ру́копись** ҡулъяҙманы редакторлау **2.** (*руководить изданием чего-л.*) мөхәррир булып эшләү, мөхәррирлек итеү; **редакти́ровать газе́ту** гәзиттә мөхәррир булып эшләү

**РЕДАКТИ́РОВАТЬСЯ** *несов*. *страд*. *от* **редакти́ровать**

**РЕДА́КТОР** *м* мөхәррир, редактор; **гла́вный реда́ктор** баш мөхәррир; **реда́ктор газе́ты** гәзит мөхәррире; **реда́ктор отде́ла** бүлек мөхәррире; **техни́ческий реда́ктор** техник мөхәррир

**РЕДА́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое редактор(ҙар) ...ы, мөхәррир(ҙәр) ...ы, редакторлыҡ ...ы; **реда́кторские спосо́бности** редакторлыҡ һәләте; **реда́кторские обя́занности** мөхәррир бурыстары

**РЕДА́КТОРСТВО** *с* редакторлыҡ, мөхәррирлек, редактор эше; **мастерство́ реда́кторства** мөхәррирлек оҫталығы, редакторлыҡ маһирлығы

**РЕДАКТУ́РА** *ж* тикшереү, төҙәтеү; **редакту́ра кни́ги** китапты тикшереү

**РЕДАКЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое редакция ...ы, редакторлау ...ы, редакцион; **редакцио́нная колле́гия** редакция коллегияһы; **редакцио́нные попра́вки** редакцион төҙәтмәләр

**РЕДА́КЦИЯ** *ж* **1.** (*редактирование*) редакторлау; **реда́кция те́кста** тексты редакторлау **2.** *в разн. знач*. редакция, мөхәрририәт; **гла́вная реда́кция** баш редакция; **но́вая реда́кция рома́на** романдың яңы редакцияһы; **уче́бник под реда́кцией профе́ссора** профессор редакцияһындағы дәреслек **3.** (*учреждение*) редакция, редакция бинаһы; **он уе́хал в реда́кцию** ул редакцияға китте; **сотру́дники реда́кции** редакция хеҙмәткәрҙәре

**РЕДЕ́ТЬ** *несов*. һирәгәйеү, һирәкләнеү; **лес реде́ет** урман һирәгәйә; **толпа́ реде́ла** халыҡ төркөмө һирәгәйә ине

**РЕДИ́С** *м* редис

**РЕДИ́СКА** *ж*; *разг*. *см*. **реди́с**

**РЕ́ДКИЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач*. һирәк; **ре́дкий гость** һирәк ҡунаҡ; **ре́дкий лес** һирәк урман **2.** һирәк, һирәк осрай (табыла, була) торған; **ре́дкая кни́га** һирәк осрай торған китап; **ре́дкие мета́ллы** һирәк табыла торған металдар **3.** (*исключительный*) ғәжәп, ғәҙәттән тыш; **ре́дкая красота́** ғәҙәттән тыш матурлыҡ; **ре́дкая спосо́бность** ғәҙәттән тыш һәләт

**РЕДКОВОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое һирәк сәсле

**РЕДКОЗУ́БЫЙ,** -ая, -ое һирәк тешле; **редкозу́бый гре́бень** һирәк тешле тараҡ

**РЕДКОЛЕ́СЬЕ** *с* һирәк урман

**РЕДКОЛЛЕ́ГИЯ** *ж* (*редакционная коллегия*) редколлегия, мөхәррирҙәр ҡоро; **заседа́ние редколле́гии** мөхәррирҙәр ҡороноң ултырышы

**РЕ́ДКОСТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һирәк, һирәк осрай (табыла, була) торған; **ре́дкостный слу́чай** һирәк осраҡ **2.** ғәжәп, ғәҙәттән тыш; **ре́дкостное уме́ние** ғәжәп оҫталыҡ

**РЕ́ДКОСТЬ** *ж* **1.** һирәклек; **ре́дкость населе́ния** халыҡтың һирәклеге **2.** (*редкое событие*) һирәк була (осрай) торған хәл; **дожди́ ста́ли ре́дкостью** ямғырҙар һирәк була торған хәлгә әйләнде **3.** (*редкая вещь*) һирәк осрай (табыла) торған нәмә; **библиографи́ческая ре́дкость** һирәк осрай торған китап ♦ **на ре́дкость** айырыуса, ғәҙәттән тыш

**РЕДУ́КТОР** *м*; *тех*. редуктор (*механизм, прибор*)

**РЕДУКЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *спец*. редукцион; **редукцио́нный кла́пан** редукцион клапан

**РЕДУ́КЦИЯ** *ж* **1.** *спец*., *биол*. редукция; **реду́кция глаз у пеще́рных живо́тных** мәмерйә йәнлектәренең күҙ редукцияһы **2.** *лингв*. редукция, ҡыҫҡарыу; **реду́кция безуда́рных гла́сных** баҫымһыҙ һуҙынҡыларҙың редукцияһы

**РЕДУПЛИКА́ЦИЯ** *ж*; *лингв*. редупликация, ҡабатланыу

**РЕДУ́Т** *воен*.; *уст*. редут (*хәрби нығытма*)

**РЕДУЦИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич*. *от* **редуци́ровать 2.** *прил*.; *лингв*. редукцияға бирелгән; **редуци́рованные гла́сные зву́ки** редукцияға бирелгән һуҙынҡы өндәр

**РЕДУЦИ́РОВАТЬ** *сов*., *несов*. *что* редукциялаштырыу, кәметеү, ҡыҫҡартыу

**РЕДУЦИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов*., *несов*. редукцияға бирелеү, кәмеү, ҡыҫҡарыу **2.** *несов*. *страд*. *от* **редуци́ровать**

**РЕДЧА́ЙШИЙ,** -ая, -ее *превосх*. *ст*. *от* **ре́дкий** бик һирәк

**РЕ́ДЬКА** *ж* торма ♦ **ху́же го́рькой ре́дьки** йәнгә тейгес, ялҡытҡыс

**РЕЕ́СТР** *м* **1.** реестр, исемлек; **рее́стр докуме́нтов** документтар исемлеге **2.** (*книга для записи дел и документов*) реестр; **записа́ть пи́сьма в рее́стры** реестрҙарға хаттар теркәү

**РЕЕ́СТРОВЫЙ,** -ая, -ое реестр ...ы, исемлек ...ы; **рее́стровая кни́га** реестр кенәгәһе

**РЕЖИ́М** *м*; *в разн. знач*. режим; **режи́м дня** көн режимы; **режи́м хране́ния овоще́й** йәшелсәләрҙе һаҡлау режимы; **ца́рский режи́м** батша режимы; **экономи́ческий режи́м** иҡтисади режим ♦ **режи́м реки́** йылға режимы

**РЕЖИССЁР** *м* режиссёр; **режиссёр спекта́кля** спектаклдең режиссёры

**РЕЖИССЁРСКИЙ,** -ая, -ое режиссёрлыҡ ...ы, режиссёр(ҙар) ...ы; **режиссёрский тала́нт**

режиссёрлыҡ таланты; **режиссёрское де́ло** режиссёр эше

**РЕЖИССЁРСТВО** *с* режиссёрлыҡ

**РЕЖИССИ́РОВАТЬ** *несов.* режиссёрлыҡ итеү, режиссёр эшен башҡарыу; **режисси́ровать пье́су** пьесаға режиссёрлыҡ итеү

**РЕЖИССУ́РА** *ж* **1.** режиссёрлыҡ эше **2.** (*руководство постановкой*) режиссура **3.** *собир.* режиссёрҙар

**РЕ́ЖУЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **ре́зать** **2.** *прил.* ҡырҡа торған, ҡырҡыусы ...ы; **ре́жущий инструме́нт** ҡырҡа торған инструмент **3.** *прил.* (*о боли*) ҡырҡып (бороп) алған кеүек, ныҡ, ҡаты, көслө; **ре́жущая боль** ҡырҡып алған кеүек ауыртыу

**РЕЗА́К** *м* **1.** ҙур бысаҡ, сапҡы; **реза́к для карто́на** ҡатырға өсөн ҙур бысаҡ **2.** *археол.* таш балта **3.** (*рабочий на бойне*) мал һуйыусы **4.** *тех.* ҡырҡҡыс, киҫкес

**РЕ́ЗАЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡырҡыу ...ы, киҫеү ...ы; **ре́зальный цех** ҡырҡыу цехы **2.** (*предназначенный для резки*) (ҡырҡа) киҫә торған; **ре́зальная маши́на** киҫә торған машина

**РЕ́ЗАЛЬЩИК** *м* и **РЕ́ЗАЛЬЩИЦА** *ж* **1.** ҡырҡыусы, киҫеүсе; **ре́зальщик стекла́** быяла ҡырҡыусы **2.** балыҡ эшкәртеүсе

**РЕ́ЗАННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **ре́зать** 1—5, 11

**РЕ́ЗАНЫЙ,** -ая, -ое **1.** киҫелгән, ҡырҡылған; **ре́заная бума́га** ҡырҡылған ҡағыҙ; **ре́заный хлеб** киҫелгән икмәк **2.** *спорт.* киҫә һуғылған; **ре́заный мяч** киҫә һуғылған туп; **ре́заный уда́р** киҫә һуғыу

**РЕ́ЗАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡырҡа (киҫә, турай) торған, ҡырҡыу, киҫеү, турау ...ы; **ре́зательная маши́на** киҫә торған машина; **ре́зательный стол** турай торған өҫтәл

**РЕ́ЗАТЬ** *несов.* **1.** *что* ҡырҡыу, киҫеү, телеү, турау; **ре́зать мета́лл** металл ҡырҡыу; **ре́зать мя́со** ит турау; **ре́зать пиро́г** бәлеш телеү **2.** *кого-что*; *разг.* ярыу, киҫеү; **ре́зать нары́в** шешекте ярыу **3.** *что* үтеү, киҫеү, ҡырҡыу; **но́жницы не ре́жут** ҡайсы үтмәй **4.** *кого* салыу, һуйыу, бысаҡлау, боғаҙлау; **во́лки ре́жут скот** бүреләр малды боғаҙлай; **ре́зать кур** тауыҡтар салыу **5.** *что* һырлау, семәрләү, уйып (соҡоп) биҙәк яһау, биҙәкләү; **ре́зать по де́реву** ағасты соҡоп һырлау; **ре́зать на ме́ди** еҙгә семәрләү **6.** *что* и *без доп. безл.* сәнсеп ауыртыу, (сәнсеп) әрнеү, сәнсеү; **ре́жет в животе́** эс сәнсә **7.** сағылдырыу, ҡамаштырыу, ярыу, ҡырҡыу, әрнеү; **свет ре́жет глаза́** яҡтылыҡ күҙҙе сағылдыра; **ве́тер ре́жет лицо́** ел битте әрнетә; **её го́лос ре́жет слух** уның тауышы ҡолаҡты яра **8.** (*ставить неудовлетворительную оценку*) киҫеү, батырыу; **ре́зать на экза́менах** имтихандарҙа батырыу **9.** *разг.* ярып һалыу, тураһын бәреү, тура (бәреп) әйтеү; **ре́зать пра́вду в глаза́** күҙенә тура ҡарап дөрөҫлөктө ярып һалыу **10.** *перен.*, *разг.* (*губить*) юҡ (харап) итеү, ҡуйыу; **ре́жут мой план** минең планды харап итәләр **11.** *спорт.* (*бить резаным ударом*) киҫә һуғыу; **ре́зать мяч** тупты киҫә һуғыу ♦ **ре́зать глаза́ (глаз)**: 1) күҙҙе ҡырҡыу (*асыҡ төҫө, сыбарлығы менән*); 2) күҙгә ташланыу; **ре́зать курс** *мор.* ҡарап хәрәкәтенең йүнәлешен киҫеү; **у́хо (у́ши) ре́жет** *см.* **у́хо**; **по живо́му ре́зать** тереләй һуйыу

**РЕ́ЗАТЬСЯ** *несов.* **1.** (*разделяться на части*) ҡырҡылыу, киҫелеү **2.** (*о зубах*) сығыу; **у ребёнка ре́жутся зу́бки** баланың теше сыға **3.** *разг.* сәнсешеү, һуйышыу; **ре́заться на ножа́х** бысаҡ менән сәнсешеү **4.** *разг.* уйнау, бик ҡаты уйнау, ҡомарланып уйнау; **ре́заться в ка́рты** ҡомарланып кәрт уйнау **5.** *страд. от* **ре́зать** 1, 2, 4, 5, 8, 9, 11

**РЕЗВИ́ТЬСЯ** *несов.* уйнау, шаярыу, ырғанлап (һикерәнләп, уйнаҡлап) йөрөү; **де́ти резвя́тся** балалар шаяра; **козля́та резвя́тся** кәзә бәрәстәре һикерәнләп йөрөй

**РЕ́ЗВОСТЬ** *ж* йылдамлыҡ, йылғырлыҡ, шуҡлыҡ; **ре́звость дете́й** балаларҙың шуҡлығы

**РЕЗВУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* шуҡ (шаян) ҡыҙ

**РЕ́ЗВЫЙ,** -ая, -ое **1.** теремек, шаян, шуҡ; **ре́звый ребёнок** теремек бала **2.** (*быстрый в беге*) йылдам, йүгерек, сапсан; **ре́звый за́яц** йүгерек ҡуян

**РЕЗЕДА́** *ж* резеда (*хуш еҫле гөл*)

**РЕЗЕДО́ВЫЙ,** -ая, -ое резеда ...ы; **резедо́вый за́пах** резеда еҫе; **резедо́вое ма́сло** резеда майы

**РЕЗЕ́РВ** *м*; *в разн. знач.* резерв; **продово́льственные резе́рвы** аҙыҡ резервтары; **произво́дственные резе́рвы** етештереү резервтары; **резе́рв кома́ндования** командование резервы; **трудовы́е резе́рвы** хеҙмәт резервтары

**РЕЗЕРВА́ЦИЯ** *ж* резервация (**1.** *запасҡа ҡалдырыу* **2.** *ниндәйҙер мәсьәлә хаҡында яңынан һөйләп, хоҡуғын уҙеңдә ҡалдырыу* **3.** *Төньяҡ Америкала, Көньяҡ Африкала һәм Австралияла төп ерле халыҡты көсләп урынлаштырыу өсөн билдәләнгән территория*); **резерва́ции инде́йцев** индеецтар резервацияһы

**РЕЗЕРВИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* резервта ҡалдырыу (һаҡлау); **резерви́ровать запа́сы не́фти** нефть запастарын резервта һаҡлау

**РЕЗЕРВИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **резерви́ровать**

**РЕЗЕРВИ́СТ** *м* резервтағы (*резервта тороусы*); **призы́в резерви́стов** резервтағыларҙы армияға алыу

**РЕЗЕ́РВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*находящийся в запасе*) һаҡлыҡ ...ы, резерв ...ы; **резе́рвный фонд** һаҡлыҡ фонды **2.** *воен.* (*находящийся в резерве*) резерв, резервтағы; **резе́рвные войска́** резерв ғәскәрҙәр

**РЕЗЕРВУА́Р** *м* резервуар; **резервуа́р для воды́** һыу резервуары

**РЕЗЕ́Ц** *м* ҡырҡҡыс; **резе́ц ску́льптора** скульптор ҡырҡҡысы **2.** (*зуб*) алғы теш, ҡырҡҡыс теш

**РЕЗИДЕ́НТ** *м* резидент (**1.** *урта быуаттарҙа: сит илдең ҡайһылыр бер илдә торған дипломатик вәкиле* **2.** *империалистик дәүләттең протектораттағы ғәмәлдә хакимлыҡ иткән вәкиле* **3.** *ҡайһылыр илдең сит дәүләттә йәшәгән граждане* **4.** *разведканың сит дәүләттәге вәкиле*)

**РЕЗИДЕ́НЦИЯ** *ж* резиденция (*хөкүмәттең, дәүләт башлыҡтарының даими торған урыны*); **резиде́нция прави́тельства** хөкүмәт резиденцияһы

**РЕЗИ́НА** *ж* резина; **техни́ческая рези́на** техник резина; **изде́лия из рези́ны** резина әйберҙәр

**РЕЗИ́НКА** *ж*; *разг.* **1.** юйғыс, юйма; **рези́нка для карандаша́** ҡәләм юйғысы; **черни́льная рези́нка** ҡара юйғысы **2.** (*резиновая тесёмка*) һуҙылмаҡ резинка (*һуҙылып тормалы резина ҡатнаш ейәк*) **3.** резинка, бәйләм төрө (*ғәҙәттә беләҙек бәйләү өсөн*)

**РЕЗИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** резина ...ы; **рези́новое произво́дство** резина производствоһы **2.** резина; **рези́новые кало́ши** резина галош; **рези́новый мяч** резина туп

**РЕ́ЗКА** *ж см.* **ре́зать** 1; **ре́зка соло́мы** һалам турау; **ре́зка то́рфа** торф ҡырҡыу; **га́зовая ре́зка** газ менән ҡырҡыу

**РЕ́ЗКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*проявляющийся с большой остротой*) ҡаты, әсе, киҫкен, зәһәр; **ре́зкий ве́тер** әсе ел; **ре́зкий хо́лод** ҡаты һыуыҡ **2.** (*неприятно действующий на органы чувств*) артыҡ) көслө, үткер, әсе, күҙ ҡамаштырғыс (сағылдырғыс); **ре́зкий за́пах** үткер еҫ; **ре́зкий свет** күҙ сағылдырғыс яҡтылыҡ **3.** (*отчётливый*) аныҡ, асыҡ, ҡаты; **ре́зкие черты́** аныҡ һыҙаттар **4.** (*внезапный, порывистый*) ҡапыл, киҫкен; **ре́зкое движе́ние** киҫкен хәрәкәт; **ре́зкое повыше́ние цен** хаҡтарҙың ҡапыл күтәрелеүе; **ре́зкое похолода́ние** ҡапыл һыуытыу **5.** (*высказанный с обидной прямотой*) тупаҫ, ҡаты, киҫкен; **ре́зкая кри́тика** ҡаты тәнҡит; **ре́зкое сло́во** ҡаты һүҙ

**РЕ́ЗКОСТЬ** *ж* **1.** киҫкенлек, зәһәрлек, әселек; **ре́зкость ве́тра** елдең зәһәрлеге **2.** көс, әселек, үткерлек; **ре́зкость го́лоса** тауыштың әселеге **3.** киҫкенлек, кинәт (ҡапыл) булыу; **ре́зкость движе́ний** хәрәкәттең киҫкенлеге **4.** тупаҫлыҡ, ҡатылыҡ, киҫкенлек; **ре́зкость вопро́са** һорауҙың тупаҫлығы **5.** тупаҫ (ҡаты) һүҙҙәр; **наговори́ть ре́зкостей** ҡаты һүҙҙәр әйтеп ташлау

**РЕЗНО́Й,** -ая, -ое семәрле, һырлы; **резно́й шкаф** семәрле шкаф; **резно́й узо́р** һырлы биҙәк

**РЕЗНУ́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **ре́зать** 1–3, 6, 7, 11

**РЕЗНЯ́** *ж* һуйыш, киҫеш, үлтереш; **крова́вая резня́** ҡанлы һуйыш; **устро́ить резню́** һуйыш ойоштороу

**РЕЗОЛЮТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое һығымта ...ы, йомғаҡлау ...ы, резолютив, резолюция ...ы; **резолюти́вная часть реше́ния** ҡарарҙың һығымта өлөшө

**РЕЗОЛЮ́ЦИЯ** *ж* **1.** (*решение*) резолюция, ҡарар; **приня́ть резолю́цию** ҡарар ҡабул итеү **2.** (*распоряжение*) резолюция; **наложи́ть резолю́цию** резолюция һалыу

**РЕЗО́Н** *м*; *разг.* нигеҙ, мәғәнә, дәлил; **в э́том нет резо́на** бында мәғәнә юҡ

**РЕЗОНА́НС** *м* **1.** *физ., тех.* резонанс (*есемдең билдәле бер тулҡын тәьҫирендә тирбәлеүе*); **механи́ческий резона́нс** механик резонанс **2.** резонанс, яңғыраш (*бина эсендә тауыш яңғырауы, яҡшы ишетелеүе*); **в за́ле хоро́ший резона́нс** залдың яңғырашы яҡшы **3.** *перен.* (*отголосок*) яңғыраш, ижтимағи сағылыш, тәьҫир, резонанс; **статья́ получи́ла неожи́данный резона́нс** мәҡәлә көтөлмәгән яңғыраш алды

**РЕЗОНА́НСНЫЙ,** -ая, -ое резонанслы, яңғырау ...ы, яңғырашлы; **резона́нсные колеба́ния** резонанслы тирбәлеүҙәр; **резона́нсные сво́йства помеще́ния** бинаның яңғырау үҙенсәлеге

**РЕЗОНА́ТОР** *м*; *физ., тех.* резонатор (*тауышты көсәйтеү өсөн ҡулайлама*)

**РЕЗОНЁР** *м* резонёр (**1.** *аҡыл һатырға яратыусы кеше* **2.** *әҙ. театрҙа, пьесала һәм романдарҙа һүрәтләнгән ваҡиғаларға автор мөнәсәбәтен белдергән персонаж*)

**РЕЗОНЁРСТВО** *с* резонёрлыҡ, аҡыл һатыу, өгөт-нәсихәт уҡыу; **скло́нность к резонёрству** аҡыл һатырға әүәҫлек

**РЕЗОНЁРСТВОВАТЬ** *несов.* резонёрлыҡ итеү, аҡыл һатыу, өгөт-нәсихәт уҡыу

**РЕЗОНИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** резонанс алыу, көсәйеү; **звук резони́рует** тауыш көсәйә **2.** резонанс биреү, резонанслау; **сте́ны за́ла хорошо́ резони́руют** зал стеналары яҡшы резонанс бирә

**РЕЗО́ННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* нигеҙле, дәлилле, төплө; **резо́нное замеча́ние** нигеҙле иҫкәрмә

**РЕЗУЛЬТА́Т** *м* һөҙөмтә, нәтижә; **отрица́тельный результа́т** кире һөҙөмтә; **результа́т рабо́ты** эш һөҙөмтәһе ♦ **в результа́те**: 1) (*в итоге*) һөҙөмтәлә, ахырҙа, нәтижәлә; 2) *в знач. предлога с род. п.* (*вследствие чего-л.*) һөҙөмтәһендә, нәтижәһендә, арҡаһында; **в результа́те боле́зни** ауырыу арҡаһында

**РЕЗУЛЬТАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һөҙөмтәле, нәтижәле; **результати́вный о́пыт** һөҙөмтәле тәжрибә **2.** (*успешный*) уңышлы, уңышҡа өлгәшкән, нәтижәле; **результати́вный игро́к** нәтижәле уйынсы

**РЕЗУЛЬТА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*имеющий положительный результат*) һөҙөмтәле, нәтижәле **2.** (*с результатами*) һөҙөмтә ...ы, нәтижә ...ы, йомғаҡлау ...ы; **результа́тная ве́домость** йомғаҡлау ведомосы

**РЕ́ЗЧИК** *м* и **РЕ́ЗЧИЦА** *ж* **1.** (*рабочий*) ҡырҡыусы, киҫеүсе, тураусы **2.** (*мастер по резьбе*) һырсы, биҙәк яһаусы; **ре́зчик по ко́сти** һөйәк һырсыһы; **ре́зчик по мра́мору** мәрмәр һырсыһы

**РЕЗЬ** *ж* әсетеп (киҫеп) ауыртыу, сәнсеү, бороу; **резь в глаза́х** күҙ әсетеп ауыртыу

**РЕЗЬБА́** *ж* **1.** һырлау, биҙәкләү, семәрләү; **приступи́ть к резьбе́** семәрләүгә тотоноу **2.** (*узор*) биҙәк, семәр; **краси́вая резьба́** матур биҙәк **3.** *тех.* һыр; **резьба́ винта́** винт һыры

**РЕЗЬБОВО́Й,** -ая, -ое *тех.* **1.** һырлы; **резьбово́е кольцо́** һырлы ҡулса **2.** һыр ...ы; **резьбово́й кали́бр** һыр үлсәме

**РЕЗЮМЕ́** *с нескл.* резюме, ҡыҫҡаса һығымта, йомғаҡлау; **резюме́ докла́да** докладтың ҡыҫҡаса һығымтаһы

**РЕЗЮМИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* резюме яһау, ҡыҫҡаса йомғаҡлау; **резюми́ровать пре́ния** фекер алышыуҙарҙы ҡыҫҡаса йомғаҡлау

**РЕИНФЕ́КЦИЯ** *ж; мед.* реинфекция (*бер үк инфекцион ауырыуҙың ҡабатлап йоғоуы*)

**РЕЙ** *м* и **РЕ́Я** *ж; мор.* рей, рея (*тура елкәндәрҙе беркетеү өсөн ҡуйылған арҡыры ағас*)

**РЕЙД I** *м; мор.* рейд (*портта йәки портҡа яҡын ерҙә караптарҙың якорҙа тороу урыны*)

**РЕЙД II** рейд (**1.** *хәрб. атлыларҙың, партизан отрядтарының йәки башҡа хәрби частарҙың дошман тылына үтеп инеп, һөжүм яһауҙары* **2.** *ҡапыл эшләнгән тикшереү*)

**РЕ́ЙДЕР** *м* рейдер (*диңгеҙ юлдарында дошмандың транспорт, сауҙа судноларын юҡҡа сығарыу эшен үҙ аллы алып барыусы карап*)

**РЕЙДИ́РОВАТЬ** *сов., несов.; воен.* рейд яһау, рейдҡа сығыу

**РЕ́ЙДОВЫЙ I,** -ая, -ое рейд ...ы, рейдтағы; **ре́йдовый прича́л** рейд причалы

**РЕ́ЙДОВЫЙ II,** -ая, -ое рейд ...ы, рейдтағы, рейдҡа ебәрелгән; **ре́йдовая гру́ппа** рейд төркөмө

**РЕ́ЙКА** *ж* рейка (**1.** *тар йоҡа таҡта* **2.** *геод. тигеҙлек һәм бейеклекте үлсәүҙә ҡулланыла торған бүлемле үлсәү таҡтаһы*); **снегоме́рная ре́йка** ҡар үлсәгес рейка

**РЕЙС** *м* рейс, юл; **обра́тный рейс** кире юл; **сде́лать оди́н рейс** бер рейс яһау

**РЕ́ЙСОВЫЙ,** -ая, -ое рейс ...ы, билдәле маршрут ...ы; **ре́йсовое вре́мя** рейс ваҡыты; **ре́йсовый авто́бус** билдәле маршрут автобусы

**РЕЙСФЕ́ДЕР** *м* рейсфедер (**1.** *һыҙма инструменты* **2.** *ҡыҫҡа ҡәләмде кейҙереп ҡуя торған металл көпшә*)

**РЕЙСШИ́НА** рейсшина (*һыҙма эшендә ҡулланылған ҙур линейка*)

**РЕ́ЙТИНГ** *м; в разн. знач.* рейтинг (*эшмәкәрлектәге абруй, мәртәбәлелек*); **рост ре́йтинга президе́нта** президенттың рейтингы үҫеү

**РЕЙТУ́ЗЫ** *только мн.* рейтуз (**1.** *һыбай йөрөү өсөн тегелгән махсус тар балаҡлы салбар* **2.** *ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар өсөн бәйләнгән оҙон ыштан*)

**РЕЙХСТА́Г** *м* рейхстаг (*1945 й. тиклем Германия парламенты һәм уның бинаһы*)

**РЕКА́** *ж* **1.** йылға; **глубо́кая река́** тәрән йылға; **доли́на реки́** йылға буйы; **у́стье реки́** йылға тамағы; **бе́рег реки́** йылға яры; **мост че́рез ре́ку** йылға аша күпер **2.** *в знач. нареч.* **реко́й** йылға (даръя) булып, күп; **слёзы лью́тся реко́й** күҙ йәштәре йылға булып аға

**РЕ́КВИЕМ** *м* реквием (**1.** *ҡайғылы музыка әҫәре* **2.** *католиктарҙа йыназа уҡыу*)

**РЕКВИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* тартып алыу, реквизициялау; **реквизи́ровать ча́стные маши́ны** шәхси машиналарҙы тартып алыу

**РЕКВИЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **реквизи́ровать**

**РЕКВИЗИ́Т** *м; театр., кино* реквизит (*спектакль, кино барышында актёрҙар ҡуллана торған кәрәк-ярак*)

**РЕКВИЗИ́ТОР** *м; театр., кино.* реквизитор

**РЕКВИЗИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое реквизициялау ...ы, тартып алыусы; **реквизицио́нная распи́ска** реквизициялау ҡағыҙы; **реквизицио́нный отря́д** тартып алыусы отряд

**РЕКВИЗИ́ЦИЯ** *ж* тартып алыу, реквизициялау; **угна́ть лошаде́й от реквизи́ции** аттарҙы реквизициялауҙан алып ҡасыу

**РЕКЛА́МА** *ж* реклама; **театра́льная рекла́ма** театр рекламаһы

**РЕКЛАМА́ЦИЯ** *ж; торг., эк.* рекламация, дәғүә; **заяви́ть реклама́цию** дәғүә белдереү

**РЕКЛАМИ́РОВАТЬ I** *сов., несов. кого* **1.** *что* рекламалау, реклама биреү; **рекламирова́ть кни́гу в газе́тах** гәзиттәрҙә китапты рекламалау **2.** (*распространять сведения о ком-л. с целью создания популярности*) үтә (артыҡ ныҡ) маҡтау; **рекламировать депута́та пе́ред населе́нием** халыҡ алдында депутатты артыҡ маҡтау

**РЕКЛАМИ́РОВАТЬ II** *сов., несов. что; торг., эк.* рекламациялау, рекламация биреү, дәғүәләшеү

**РЕКЛАМИ́СТ** *м* рекламасы (*реклама менән шөғөлләнеүсе*)

**РЕКЛА́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** реклама ...ы; **рекла́мный отде́л** реклама бүлеге **2.** рекламалы, рекламанан торған, реклама тибындағы; **рекла́мная статья́** рекламалы мәҡәлә

**РЕКОГНОСЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что; воен., геод.* рекогносцировкалау, рекогносцировка яһау, өйрәнеү; **рекогносци́ровать ме́стность** урынды рекогносцировкалау

**РЕКОГНОСЦИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **рекогносци́ровать**

**РЕКОГНОСЦИРО́ВКА** *ж; воен., геод. см.* **рекогносци́ровать**; **рекогносциро́вка ме́стности** урынға рекогносцировка яһау, урынды өйрәнеү

**РЕКОГНОСЦИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *воен., геод.* рекогносцировка ...ы; **рекогносциро́вочная гру́ппа** рекогносцировка төркөмө; **рекогносциро́вочные рабо́ты** рекогносцировка эштәре

**РЕКОМЕНДА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое рекомендация ...ы, рекомендациялы; **рекоменда́тельная запи́ска** рекомендация ҡулхаты

**РЕКОМЕНДА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **рекомендова́ть 2.** рекомендация, баһа; **хоро́шая рекоменда́ция** яҡшы баһа; **дать рекоменда́цию** рекомендация биреү **3.** (*совет*) кәңәш, тәҡдим; **вы́полнить рекоменда́ции коми́ссии** комиссия тәҡдимдәрен үтәү

**РЕКОМЕНДОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* **1.** рекомендация биреү, рекомендациялау, баһа биреү, тәҡдим итеү; **рекомендова́ть как о́пытного рабо́тника** тәжрибәле хеҙмәткәр тип тәҡдим итеү **2.** *с неопр.* (*советовать*) кәңәш биреү (итеү); **рекомендова́ть отдохну́ть** ял итергә кәңәш биреү **3.** (*представить при знакомстве*) таныштырыу; **рекомендова́ть гостя́м** ҡунаҡтар менән таныштырыу

**РЕКОМЕНДОВА́ТЬСЯ 1.** *сов., несов.* үҙең менән таныштырыу **2.** *только несов. страд. от* **рекомендова́ть**

**РЕКОНСТРУИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** (*усовершенствовать, перестроив коренным образом*) реконструкциялау, нигеҙенән үҙгәртеп ҡороу, яңыртып ҡороу; **реконструи́ровать заво́д** заводты нигеҙенән үҙгәртеп ҡороу **2.** (*воссоздать*) тергеҙеү, яңыртыу; **реконструи́ровать мече́ть** мәсетте яңыртыу

**РЕКОНСТРУИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* үҙгәреү, яңырыу, тергеҙелеү **2.** *только несов. страд. от* **реконструи́ровать**

**РЕКОНСТРУКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое реконструктив, реконструкция(лау) ...ы, үҙгәртеп ҡороу ...ы; **реконструкти́вный пери́од в разви́тии наро́дного хозя́йства** халыҡ хужалығы үҫешендәге үҙгәртеп ҡороу осоро; **реконструкти́вное предложе́ние** реконструктив тәҡдим

**РЕКОНСТРУ́КЦИЯ** *ж см.* **реконструи́ровать, реконструи́роваться**; **реконстру́кция па́мятников старины́** боронғо ҡомартҡыларҙы яңыртыу

**РЕКО́РД** *м*; *в разн. знач.* рекорд; **мирово́й реко́рд** донъя рекорды; **поста́вить реко́рд** рекорд ҡуйыу; **реко́рд выно́сливости** сыҙамлылыҡ рекорды

**РЕКОРДИ́СТ** *м* и **РЕКОРДИ́СТКА** *ж*; *в разн. знач.* рекордсы; **спортсме́н-рекорди́ст** рекордсы спортсмен

**РЕКО́РДНЫЙ,** -ая, -ое рекорд ...ы, рекордлы, иң юғары (ҙур); **реко́рдная рабо́та** рекордлы эш; **реко́рдная ско́рость** иң юғары тиҙлек

**РЕКОРДСМЕ́Н** *м* и **РЕКОРДСМЕ́НКА** *ж* рекордсмен, рекордсы

**РЕ́КРУТ** *м* никрут, рекрут (*XVIII б. – XIX б. беренсе яртыһында Рәсәйҙә мәжбүри хеҙмәт иткән кеше*); **сдать в ре́круты** рекрутҡа биреү

**РЕКРУТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого* рекрутлыҡҡа алыу (йыйыу)

**РЕКРУТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **рекрути́ровать**

**РЕКРУ́ТСКИЙ** и *уст.* **РЕ́КРУТСКИЙ,** -ая, -ое рекрут(тар) ...ы ♦ **ре́крутская пови́нность** рекрут йөкләмәһе

**РЕКРУ́ТСТВО** *с* рекрутлыҡ; **спаса́ться от рекру́тства** рекрутлыҡтан ҡотолоу

**РЕКТИФИКА́Т** *м*; *спец.* ректификат (*ректификация юлы менән төрлө ҡушылмаларҙан таҙартылған шыйыҡлыҡ*)

**РЕКТИФИКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* ректификация ...ы, ректификатлай торған; **ректификацио́нный аппара́т** ректификация аппараты; **ректификацио́нный проце́сс** ректификация процесы

**РЕКТИФИКА́ЦИЯ** *ж*; *спец.* ректификация, ректификациялау (*шыйыҡ ҡатнашмаларҙы бер-береһенән айырыу ысулы*); **аппара́т ректифика́ции** ректификация аппараты; **ректифика́ция спи́рта** спиртты ректификациялау

**РЕКТИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *спец.* ректификатлау, таҙартыу; **ректифици́ровать бензи́н** бензинды ректификатлау

**РЕКТИФИЦИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **ректифици́ровать**

**РЕ́КТОР** *м* ректор; **ре́ктор университе́та** университет ректоры

**РЕКТОРА́Т** *м* ректорат; **заседа́ние ректора́та** ректорат ултырышы

**РЕ́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое ректор ...ы; **ре́кторский кабине́т** ректор кабинеты

**РЕ́КТОРСТВО** *с* ректорлыҡ (вазифаһы); **согласи́ться на ре́кторство** ректорлыҡҡа ризалыҡ биреү

**РЕЛЕ́** *с нескл.* реле (*электр ағымын билдәле шартта үҙөп-ялғап тора торған автоматик ҡорамал*); **конта́ктное реле́** контакт релеһы; **магни́тное реле́** магнитлы реле

**РЕЛЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое реле ...ы; **реле́йный цех** реле цехы

**РЕЛИГИО́ЗНОСТЬ** *ж* дингә ышаныу (инаныу), диндарлыҡ; **впасть в религио́зность** дингә ышанып китеү; **религио́зность челове́ка** кешенең диндарлығы

**РЕЛИГИО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дини; **религио́зный пра́здник** дини байрам; **религио́зные предрассу́дки** дини хөрәфәттәр **2.** (*приверженный религии*) динле, диндар; **быть религио́зным** диндар булыу

**РЕЛИ́ГИЯ** *ж* дин; **мусульма́нская рели́гия** мосолман дине; **христиа́нская рели́гия** христиан дине

**РЕЛИ́КВИЯ** *ж* **1.** реликвия, изге нәмә (*дини ҡараш буйынса, мөғжизәле көскә эйә булған нәмә*) **2.** (*вещь, хранимая как память о прошлом*) ҡомартҡы, йәдкәр, иҫтәлек; **истори́ческие рели́квии** тарихи ҡомартҡылар; **семе́йные рели́квии** ғаилә ҡомартҡылары

**РЕЛИ́КТ** *м* реликт, ҡалдыҡ (*боронғо дәүерҙән һаҡланып ҡалған күренеш йәки нәмә*); **рели́кты леднико́вой эпо́хи** боҙлоҡ дәүере реликттары

**РЕЛИ́КТОВЫЙ,** -ая, -ое реликт, ҡалдыҡ; **рели́ктовые живо́тные** реликт йәнлектәр; **рели́ктовые расте́ния** реликт үҫемлектәр

**РЕЛЬЕ́Ф** *м* **1.** рельеф, өҫкө йөҙ; **го́рный релье́ф** таулы рельеф; **релье́ф морско́го дна** диңгеҙ төбө рельефы **2.** (*выпуклое изображение на плоскости*) ҡабарынҡы һүрәт, рельеф; **рисова́ть релье́фом** рельеф менән һүрәт төшөрөү

**РЕЛЬЕ́ФНОСТЬ** *ж* ҡабарынҡылыҡ; **релье́фность рису́нка** һүрәттең ҡабарынҡылығы

**РЕЛЬЕ́ФНЫЙ,** -ая, -ое рельефлы, ҡабарынҡы; **релье́фный узо́р** ҡабарынҡы биҙәк; **релье́фные обо́и** рельефлы обой

**РЕЛЬС** *м* и *прост.* **РЕ́ЛЬСА** *ж* рельс; **уложи́ть ре́льсы** рельс һалыу ♦ **стать (перейти́, перевести́ и т.п.) на ре́льсы** *чего* ниндәйҙер эшкә йүнәлтеү, юл алыу; **на ре́льсы поста́вить** *что* йүнәлеш биреү, юлға баҫтырыу

**РЕ́ЛЬСОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** рельс ...ы; **ре́льсовая сталь** рельс ҡоросо; **ре́льсовые ве́тки** рельс тармаҡтары **2.** рельслы; **ре́льсовый путь** рельслы юл

**РЕЛЬСОПРОКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** рельс прокатлау ...ы, рельс эшләй торған; **рельсопрока́тный стан** рельс прокатлау станы **2.** *в знач. сущ.* **рельсопрока́тная** *ж* рельс прокатлау оҫтаханаһы; **рабо́тать в рельсопрока́тной** рельс прокатлау оҫтаханаһында эшләү

**РЕЛЯТИВИ́ЗМ** *м*; *филос.* релятивизм (*донъяны танып-белеүҙе инҡар иткән идеалистик фәлсәфәүи принцип*)

**РЕЛЯТИВИ́СТ** *м*; *филос.* релятивист (*релятивизм тарафдары*)

**РЕЛЯТИВИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое релятивизм ...ы, релятивист ...ы; **релятиви́стский взгляд** релятивизм ҡарашы

**РЕЛЯТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* сағыштырма, релятив

**РЕМА́РКА** *ж* **1.** иҫкәрмә, билдә **2.** *театр.* ремарка, аңлатма (*авторҙың пьеса тексында эш-хәлде, персонаждарҙың тышҡы күренешен һ.б. һүрәтләп биргән аңлатмаһы*)

**РЕ́МЕЗ** *м* (*вид синицы*) ҡоролдай; **гнездо́ ре́меза** ҡоролдай ояһы

**РЕМЁННЫЙ,** -ая, -ое ҡайыш; **ремённый кнут** ҡайыш сыбыртҡы; **ремённая узде́чка** ҡайыш йүгән

**РЕМЕ́НЬ** *м* **1.** *в разн. знач.* ҡайыш; **реме́нь для брюк** салбар ҡайышы; **реме́нь молоти́лки** молотилка ҡайышы; **солда́тский реме́нь** һалдат ҡайышы **2.** *мн.* **ремни́** (*для переноски ручного багажа*) ҡайыш, бау

**РЕМЕ́СЛЕННИК** *м* **1.** һөнәрсе; **ме́лкий реме́сленник** ваҡ һөнәрсе **2.** *разг.* (*ученик ремесленного училища*) ремесленник

**РЕМЕ́СЛЕННИЧАТЬ** *несов.* **1.** һөнәрселек менән көн күреү, һөнәрселек итеү, һөнәрселек менән шөғөлләнеү **2.** *перен.* (*работать по шаблону*) ижади эшләмәү, ҡалып буйынса эшләү

**РЕМЕ́СЛЕННИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ижади эшләнмәгән, ҡалып буйынса эшләнгән; **реме́сленническая кни́га** ҡалып буйынса эшләнгән китап

**РЕМЕ́СЛЕННИЧЕСТВО** *с* **1.** һөнәрселек **2.** *перен.* ижади эшләмәү, ҡалып буйынса эшләү

**РЕМЕ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** һөнәрсе ...ы, һөнәрселек ...ы; **реме́сленный труд** һөнәрселек хеҙмәте **2.** (*неискусный*) ҡалып буйынса эшләнгән, тупаҫ; **реме́сленная рабо́та** тупаҫ эш ♦ **реме́сленное учи́лище** һөнәрселек училищеһы

**РЕМЕСЛО́** *с* һөнәр; **портня́жное ремесло́** тегеүсе һөнәре; **учи́ться ремеслу́** һөнәргә өйрәнеү

**РЕМЕШО́К** *м* ҡайыш; **ремешо́к для часо́в** сәғәт ҡайышы

**РЕМИ́З** *м* ремиз (**1.** *ҡайһы бер кәрт уйынында: взяткаHы йыя алмау йәки йыя алмаған өсөн штраф* **2.** *спорт. фехтованиела киҫәтеү өсөн һуғыу* **3.** *фин. күсерелмә вексель буйынса аҡса түләү*)

**РЕМИЛИТАРИЗА́ЦИЯ** *ж* ремилитаризация, яңынан ҡоралланыу

**РЕМИЛИТАРИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* ремилитаризациялау, яңынан ҡоралландырыу

**РЕМИЛИТАРИЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **ремилитаризи́ровать**

**РЕМИНИСЦЕ́НЦИЯ** *ж*; *книжн.* **1.** томанлы хәтерләү (иҫкә төшөрөү) **2.** реминисценция (*музыкаль, әҙәби һәм башҡа әҫәрҙәрҙә берәй кеше ижадының йоғонтоһо һиҙелеп, сағылып ҡалыу*)

**РЕМИ́ССИЯ** *ж* **1.** *мед.* ремиссия (*ауырыуҙың еңеләйеү ваҡыты*) **2.** *торг.* (*скидка*) ташлама

**РЕМО́НТ I** *м* ремонт, йүнәтеү, төҙәтеү, ямау, һиплэү; **ремо́нт до́ма** өй һиплэү; **ремо́нт о́буви** аяҡ кейемен төҙәтеү; **ремо́нт часо́в** сәғәт йүнәтеү; **теку́щий ремо́нт** ағымдағы ремонт

**РЕМО́НТ II** *м* **1.** *воен.* тултырыу, ремонт, тулыландырыу **2.** *с.-х.* (*пополнение убыли*) тултырыу, тулыландырыу, үрсетеү, ремонт; **ремо́нт поголо́вья скота́** мал һанын тулыландырыу

**РЕМОНТИ́РОВАТЬ I** *несов. что* ремонтлау, йүнәтеү, төҙәтеү, ямау, һиплэү; **ремонти́ровать часы́** сәғәтте төҙәтеү; **ремонти́ровать маши́ну** машина ремонтлау

**РЕМОНТИ́РОВАТЬ II** *сов., несов. что*; *воен., уст.* тулыландырыу

**РЕМОНТИ́РОВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **ремонти́ровать** I

**РЕМОНТИ́РОВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **ремонти́ровать** II

**РЕМО́НТНИК** *м* ремонтсы, төҙәтеүсе, йүнәтеүсе; **сле́сарь-ремо́нтник** ремонтсы слесарь

**РЕМО́НТНЫЙ I,** -ая, -ое ремонт ...ы, ремонтлау ...ы, төҙәтеү ...ы, йүнәтеү ...ы; **ремо́нт-**

**ная мастерска́я** ремонт оҫтаханаһы; **ремо́нтные рабо́ты** йүнәтеү эштәре

**РЕМО́НТНЫЙ II,** -ая, -ое **1.** *воен.* ремонт ...ы, тулыландырыу ...ы; **ремо́нтные ло́шади** тулыландырыуға алынған аттар **2.** *с.-х.* үрсем ...ы, үрсетеү ...ы, ремонт ...ы, үрсем алыу өсөн аҫрау (аҫрала торған); **ремо́нтная ма́тка** үрсем алыу өсөн аҫралған инә мал

**РЕНАТУРАЛИЗА́ЦИЯ** *ж*; *юр.* ренатурализация (*берәй сәбәп менән граждандлыҡ хоҡуғын юғалтҡан кешегә яңынан уҙ иле гражданы булыу хоҡуғын ҡайтарыу*)

**РЕНЕГА́Т** *м* мөртәт, хыянатсы, һатлыҡ йән, ренегат

**РЕНЕГА́ТСТВО** *с* мөртәтлек, хыянатсылыҡ, ренегатлыҡ; **поли́тика ренега́тства** ренегатлыҡ сәйәсәте

**РЕНЕССА́НС** *м* Ренессанс (*Яңырыу дәүере*)

**РЕНКЛО́Д** *м* ренклод (*слива сорты*)

**РЕ́НТА** *ж* рента (**1.** *иҡт. капитал, мөлкәт йәки ерҙән, бер ниндәй көс түкмәй, даими рәүештә алына торған килем* **2.** *фин. дәүләт займы облигацияларына түләнгән процент*); **де́нежная ре́нта** аҡса рентаһы; **натура́льная ре́нта** натураль рента; **плати́ть ре́нту** рента түләү

**РЕНТА́БЕЛЬНОСТЬ** *ж* рентабеллек, килемлелек; **рента́бельность хозя́йства** хужалыҡтың рентабеллеге; **повы́сить рента́бельность** рентабеллекте күтәреү

**РЕНТА́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое рентабелле, килемле, төшөмлө; **рента́бельная о́трасль** рентабелле тармаҡ; **рента́бельное хозя́йство** рентабелле хужалыҡ

**РЕНТГЕ́Н** *м* **1.** *разг. см.* **рентге́новские лучи́** **2.** (*аппарат*) рентген

**РЕНТГЕ́НОВ: рентге́новы лучи́** *см.* **рентге́новские лучи́**

**РЕНТГЕ́НОВСКИЙ,** -ая, -ое рентген ...ы; **рентге́новский аппара́т** рентген аппараты; **рентге́новский кабине́т** рентген кабинеты; **рентге́новский сни́мок** рентген һүрәте ♦ **рентге́новские лучи́** рентген нурҙары (*ҡыҫҡа тулҡынлы электромагнит булған күп нәмәләр аша үтә алған күренмәҫ нурҙар*)

**РЕНТГЕНОГРА́ММА** *ж* рентгенограмма (*рентген нурҙары ярҙамында төшөрөлгән фотоһүрәт*)

**РЕНТГЕНОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое рентгенографик; **рентгенографи́ческий сни́мок** рентгенографик һүрәт

**РЕНТГЕНОГРА́ФИЯ** *ж* рентгенография (*рентген нурҙары ярҙамында фотоға төшөрөү*); **рентгеногра́фия грудно́й кле́тки** күкрәк ситлеге рентгенографияһы

**РЕНТГЕНОДИАГНО́СТИКА** *ж* рентгенодиагностика (*рентген нурҙары ярҙамында ауырыуҙы асыҡлау*)

**РЕНТГЕНО́ЛОГ** рентгенолог (*рентгенология һәм рентгенотерапия буйынса белгес, врач*); **рабо́тать рентгено́логом** рентгенолог булып эшләү

**РЕНТГЕНОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое рентгенологик; **рентгенологи́ческое наблюде́ние** рентгенологик күҙәтеү

**РЕНТГЕНОЛО́ГИЯ** *ж* рентгенология (*рентген нурҙары һәм уларҙы файҙаланыу тураһындағы медицина фәне бүлеге*)

**РЕНТГЕНОСКОПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое рентгеноскопия ...ы, рентгеноскопик; **рентгеноскопи́ческий ме́тод** рентгеноскопия ысулы

**РЕНТГЕНОСКОПИ́Я** *ж* рентгеноскопия (*рентген нурҙары ярҙамында ҡарап тикшереү*); **рентгеноскопи́я желу́дка** ашҡаҙан рентгеноскопияһы

**РЕНТГЕНОТЕРАПИ́Я** *ж* рентгенотерапия (*рентген нурҙары менән дауалау*); **глубо́кая рентгенотерапи́я** тәрән (үтешле) рентгенотерапия; **ко́свенная рентгенотерапи́я** ситләтелгән рентгенотерапия

**РЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое *эк.*, *фин.* рента ...ы; **ре́нтный дохо́д** рента килеме

**РЕОМЮ́Р: шкала́ Реомю́ра** Реомюр *шкалаһы* (*һыуҙың туңыу нөктәһенән ҡайнау нөктәһенә тиклем 80 градусҡа бүленгән термометр*)

**РЕОРГАНИЗАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое реорганизацион, реорганизация ...ы, реорганизациялау ...ы, үҙгәртеп (яңыса, ҡайтанан) ҡороу (ойоштороу, төҙөү)

**РЕОРГАНИЗА́ЦИЯ** *ж* үҙгәртеп (яңыса, ҡайтанан) ҡороу (ойоштороу, төҙөү), реорганизация

**РЕОРГАНИЗОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. что* реорганизациялау, үҙгәртеп (яңыса, ҡайтанан) ҡороу (ойоштороу, төҙөү); **реорганизова́ть рабо́ту** эште үҙгәртеп ҡороу

**РЕОРГАНИЗОВА́ТЬСЯ** **1.** *сов.*, *несов.* реорганизацияланыу, үҙгәреү, үҙгәреп ҡоролоу, нигеҙенән үҙгәреү **2.** *несов. страд. от* **реорганизова́ть**

**РЕОРГАНИЗО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **реорганизова́ть**

**РЕОРГАНИЗО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** реорганизацияланыу, үҙгәреү, үҙгәртеп ҡоролоу **2.** *страд. от* **реорганизо́вывать**

**РЕОСТА́Т** *м*; *физ.* реостат (*электр тоғының көсөн йәки электр сымындағы көсөргәнеште көйләй торған аппарат*)

**РЕ́ПА** *ж* шалҡан; **кормова́я ре́па** аңра шалҡан; **па́реная ре́па** бешкән шалҡан; **се́мя ре́пы** шалҡан орлоғо ♦ **деше́вле (про́ще) па́реной ре́пы** *см.* **па́реный**

**РЕПАРА́ЦИЯ** *ж*; *спец.* репарация (*һуғыш башлап еңелгән илдең килтергән зыяндар өсөн еңеүсе илгә түләүҙәре*)

**РЕПАРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* репарацион, репарация ...ы; **репарацио́нные платежи́** репарацион түләүҙәр

**РЕПАТРИА́НТ** *м* и **РЕПАТРИА́НТКА** *ж*; *спец.* репатриант (*тыуған иленә ҡайтҡан кеше*)

**РЕПАТРИА́ЦИЯ** *ж* репатриация, репатриациялау (*эмигранттарҙы, хәрби әсирҙәрҙе тыуған илдәренә ҡайтарыу*)

**РЕПАТРИИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого; спец.* иленә ҡайтарыу, репатриациялау

**РЕПАТРИИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* илгә ҡайтыу, репатриацияланыу **2.** *несов. страд. от* **репатрии́ровать**

**РЕПЕ́Й** *м* **1.** дегәнәк, йәбешкәк **2.** *разг. см.* **репе́йник**

**РЕПЕ́ЙНИК** *м* дегәнәк, дегәнәклек, әрекмән, йәбешкәк

**РЕПЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое дегәнәк ...ы; **репе́йное ма́сло** дегәнәк майы; **репе́йное се́мя** дегәнәк орлоғо

**РЕПЕРТУА́Р** *м* репертуар (**1.** *ҡуйыу өсөн билдәләнгән пьесалар* **2.** *бер артистың барлыҡ башҡарған ролдәре, музыкаль һәм әҙәби әҫәрҙәре*); **обновля́ть репертуа́р теа́тра** театрҙың репертуарын яңыртыу; **о́перный репертуа́р** опера репертуары

**РЕПЕРТУА́РНЫЙ,** -ая, -ое репертуар ...ы, репертуарҙағы; **репертуа́рный план** репертуар планы

**РЕПЕТИ́Р** *м* репетир (*сәғәттәрҙә һуғыу механизмы*); **часы́ с репети́ром** репетирлы сәғәт

**РЕПЕТИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* репетиция яһау; **репети́ровать пье́су** пьесаға репетиция яһау **2.** *кого* өйрәтеү, әҙерләү, (өйҙә) дәрес биреү; **репети́ровать абитурие́нта** абитуриентты әҙерләү

**РЕПЕТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **репети́ровать**

**РЕПЕТИ́ТОР** *м* репетитор (*уҡыусыға өйҙә дәрес биреүсе*); **рабо́тать репети́тором** репетитор булып эшләү

**РЕПЕТИ́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое репетиторлыҡ ...ы; **репети́торская рабо́та** репетиторлыҡ эше

**РЕПЕТИ́ТОРСТВО** *с* репетиторлыҡ (эше); **плати́ть за репети́торство** репетиторлыҡ өсөн түләү

**РЕПЕТИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое репетиция ...ы; **репетицио́нный зал** репетиция залы; **репетицио́нная рабо́та** репетиция эше

**РЕПЕТИ́ЦИЯ** *ж* репетиция (**1.** *сәхнәгә сығыр алдынан уйнап ҡарау* **2.** *бер үк нотаны тиҙ-тиҙ ҡабатлауҙан ғибәрәт булған музыкаль фраза*); **генера́льная репети́ция** генераль репетиция; **репети́ция пье́сы** пьеса репетицияһы

**РЕ́ПИЦА** *ж*; *анат.* ҡойроҡ һөйәге

**РЕ́ПЛИКА** *ж* **1.** (*ответ, возражение на чьи-л. слова*) реплика, ҡаршы һүҙ әйтеү, һүҙ ташлау (ҡыҫтырыу, ҡушыу); **подава́ть ре́плику с ме́ста** урындан һүҙ ташлау **2.** *юр.* һөйләү, реплика, яуап һүҙе **3.** *театр.* реплика (*бер артистың икенсеһе һөйләр алдынан әйткән һүҙҙәре*) **4.** *муз.* ҡабатлау (*музыкаль фразаны икенсе тонда ҡабатлау*)

**РЕ́ПНЫЙ,** -ая, -ое шалҡан ...ы; **ре́пное се́мя** шалҡан орлоғо

**РЕПНЯ́К** *м* шалҡан япрағы

**РЕ́ПОВЫЙ,** -ая, -ое шалҡан ...ы; **ре́повая гря́дка** шалҡан түтәле

**РЕПОЗИ́ЦИЯ** *ж*; *мед.* репозиция (*һынған йәки быуыны сыҡҡан һөйәктәрҙең остарын урынына ултыртыу*)

**РЕПОЛО́В** *м* (*коноплянка*) киндер турғайы

**РЕПОРТА́Ж** *м* репортаж; **газе́тный репорта́ж** гәзиттәге репортаж; **репорта́ж по ра́дио о соревнова́нии** ярыш тураһында радио аша репортаж

**РЕПОРТЁР** *м* и *разг.* **РЕПОРТЁРША** *ж* репортёр, хәбәрсе; **репортёр газе́ты** гәзит хәбәрсеһе

**РЕПОРТЁРСКИЙ,** -ая, -ое репортёр(ҙар) ...ы, хәбәрсе(ләр) ...ы; **репортёрская рабо́та** репортёр эше; **репортёрская заме́тка** репортёр мәҡәләһе

**РЕПОРТЁРСТВО** *с* репортёрлыҡ; **занима́ться репортёрством** репортёрлыҡ менән шөғөлләнеү

**РЕПОРТЁРСТВОВАТЬ** *несов.* репортёрлыҡ менән шөғөлләнеү, репортёр булып эшләү

**РЕПРЕССИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое репрессия ...ы, репрессив; **репресси́вные ме́ры** репрессив саралар

**РЕПРЕССИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* баҫтырыу, ҡыҫым яһау, репрессив саралар ҡулланыу, язалау, репрессиялау; **репресси́ровать бунтовщико́в** боласыларҙы репрессиялау

**РЕПРЕ́ССИЯ** *ж* баҫтырыу (язалау) саралары, яза, репрессия

**РЕПРОДУ́КТОР** *м* репродуктор; **включи́ть репроду́ктор** репродукторҙы тоташтырыу

**РЕПРОДУ́КЦИЯ** *ж* репродукция, күсермә (**1.** *полигр., фото. полиграфия юлы йәки фотография ысулы менән төшөрөлгән нәмәләрҙең күсермәһен алыу һәм ишәйтеү* **2.** *баҫма һүрәт, картина йәки фотография* **3.** *биол. организмдың ишәйеүе*); **репроду́кция карти́ны** картинаның күсермәһе

**РЕПРОДУЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что; фото., полигр.* репродукциялау, күсермәһен алыу

**РЕПРОДУЦИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **репродуци́ровать**

**РЕПС** *м* репс (*туҡыма*); **обши́ть ре́псом** репс менән тышлау

**РЕ́ПСОВЫЙ,** -ая, -ое репс, репс менән тышланған (көпләнгән); **ре́псовое пла́тье** репс күлдәк

**РЕПТИ́ЛИЯ** *ж*; *зоол.* рептилия, һөйрәлеүсе, һөйрәлеүсе хайуан

**РЕПУТА́ЦИЯ** *ж* репутация, ат, исем, яманат, абруй

**РЕ́ПЧАТЫЙ,** -ая, -ое шалҡан һымаҡ; **ре́пчатая фо́рма плода́** емеше шалҡан һымаҡ ♦ **ре́пчатый лук** башлы һуған

**РЕСНИ́ТЧАТЫЙ,** -ая, -ое *биол.* төклө, керпексәле; **ресни́тчатые кле́тки** төклө күҙәнәктәр

**РЕСНИ́ЦЫ** *мн.* (*ед.* **ресни́ца** *ж*) керпектәр; **дли́нные ресни́цы** оҙон керпектәр

**РЕСНИ́ЧКИ** *мн.* (*ед.* **ресни́чка** *ж*) **1.** *уменьш.-ласк. от* **ресни́цы 2.** *биол.* төк, керпексәләр (*ваҡ үҫентеләр*)

**РЕСНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** керпек …ы **2.** *биол. см.* **ресни́тчатый**

**РЕСПЕКТА́БЕЛЬНОСТЬ** *ж* олпатлыҡ, дәрәжәлек; **респекта́бельность руководи́теля** етәксенең олпатлығы

**РЕСПЕКТА́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* олпат, дәрәжәле, хөрмәтле, респектабелле; **респекта́бельный вид** олпат ҡиәфәт

**РЕСПИРА́ТОР** *м* респиратор (*тын юлдарын, күҙ-колаҡты һаҡлаусы ҡулланма*)

**РЕСПИРАТО́РНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* респиратор …ы; **респирато́рная тру́бка** респиратор торбаһы

**РЕСПУ́БЛИКА** *ж* республика; **демократи́ческая респу́блика** демократик республика; **суве-ре́нная респу́блика** суверенлы республика

**РЕСПУБЛИКА́НЕЦ** *м* и **РЕСПУБЛИКА́НКА** *ж* республикасы (*республика яҡлы кеше*)

**РЕСПУБЛИКА́НСКИЙ,** -ая, -ое республика …ы; **республика́нская фо́рма правле́ния** идара итеүҙең республика формаһы; **республика́нский бюдже́т** республика бюджеты; **республика́нский строй** республика ҡоролошо

**РЕССО́РА** *ж* сиртмә, рессор; **рессо́ра автомоби́ля** автомобиль рессоры

**РЕССО́РНЫЙ,** -ая, -ое рессорлы, сиртмәле; **рессо́рный ваго́н** рессорлы вагон

**РЕСТАВРА́ТОР** *м* реставратор, реставрациялаусы; **реставра́тор ста́рых карти́н** иҫке картиналарҙы реставрациялаусы

**РЕСТАВРА́ТОРСТВО** *с* реставраторлыҡ; **занима́ться реставра́торством** реставраторлыҡ менән шөғөлләнеү

**РЕСТАВРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое реставрация …ы; **реставрацио́нная мастерска́я** реставрация оҫтаханаһы; **реставрацио́нные рабо́ты** реставрация эштәре

**РЕСТАВРА́ЦИЯ** *ж* реставрация (**1.** *сәнғәт әҫәрҙәрен элекке хәленә ҡайтарыу* **2.** *ҡолатылған ҡоролошто яңынан тергеҙеү*); **мето́дика реставра́ции** реставрация методикаһы; **занима́ться реставра́цией** реставрация менән шөғөлләнеү; **реставра́ция в стране́** илдәге реставрация

**РЕСТАВРИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *в разн. знач.* реставрациялау, тергеҙеү, элекке хәленә ҡайтарыу; **реставри́ровать карти́ну** картинаны реставрациялау; **реставри́ровать ча́стную со́бственность** шәхси милекте тергеҙеү

**РЕСТОРА́Н** *м* ресторан; **первокла́ссный рестора́н** беренсе класлы ресторан

**РЕСТОРА́ННЫЙ,** -ая, -ое ресторан …ы; **рестора́нный обе́д** ресторан ашы

**РЕСУ́РС** *м* **1.** (*возможность*) ресурс, сара, мөмкинлек; **еди́нственный ресу́рс** берҙән-бер мөмкинлек **2.** *мн.* **ресу́рсы** (*запасы*) ресурстар, сығанаҡтар, байлыҡтар; **материа́льные ресу́рсы** материаль сығанаҡтар; **приро́дные ресу́рсы** тәбиғи байлыҡтар; **экономи́ческие ресу́рсы** иҡтисади ресурстар

**РЕТИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*усердный*) тырыш, егәрле; **рети́вый сотру́дник** тырыш хеҙмәткәр; **рети́вый хозя́ин** егәрле хужа **2.** (*резвый, горячий*) сапсан, ярһыу; **рети́вый конь** ярһыу ат

**РЕТИ́НА** *ж*; *анат.* ретина, селтәрле шекәрә (*күҙҙәге*)

**РЕТИНИ́Т** *м*; *мед.* ретинит (*селтәрле шекәрәнең шешеүе*)

**РЕТИРОВА́ТЬСЯ** *сов., несов.* **1.** *уст.* сигенеү, ҡасыу; **отря́д был вы́нужден ретирова́ться** отряд ҡасырға мәжбүр булды **2.** *разг.* (*уйти*) ҡасып китеү, шылыу, һыҙыу, юҡ булыу; **ретирова́ться незаме́тно** һиҙҙермәйенсә шылыу

**РЕТО́РТА** *ж* реторта (*оҙон кәкре муйынлы, груша формаһындағы һауыт*)

**РЕТРАНСЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *радио., теле.* ретрансляциялау; **ретрансли́ровать переда́чу** тапшырыуҙы ретрансляциялау

**РЕТРАНСЛИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **ретрансли́ровать**

**РЕТРАНСЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *радио., теле.* ретрансляция …ы; **ретрансляцио́нная радиоста́нция** ретрансляциялау радиостанцияһы

**РЕТРАНСЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *радио., теле.* ретрансляция, ретрансляциялау (*радио сигналдарын, радио һәм телевизион тапшырыуҙарҙы ҡабул итеү һәм тапшырыу*; *радиотранслятор ярҙамында радиостанцияның һәм телеүҙәктең тапшырыу радиусын киңәйтеү*)

**РЕТРОГРА́Д** *м*; *книжн.* ҡаҙимсе, ретроград

**РЕТРОГРА́ДСТВО** *с*; *книжн.* ҡаҙимселек, артта ҡалғанлыҡ; **обвиня́ть в ретрогра́дстве** ҡаҙимселектә ғәйепләү

**РЕТРОСПЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* үткәндәргә ҡараған (бағышланған); **ретроспекти́вный взгляд** үткәндәргә бағышланған ҡараш

**РЕТРОСПЕ́КЦИЯ** *ж*; *книжн.* үткәнде (боронғоно, элеккене) күҙәтеү

**РЕТУШЁР** *м* ретушсы, ретушлаусы

**РЕТУШИ́РОВАНИЕ** *с см.* **ретуши́ровать**; **ретуши́рование негати́ва** негативты һыҙмалап төҙәтеү

**РЕТУШИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* һыҙмалау, төҙәткеләү, ретушлау; **ретуши́ровать рису́нок** һүрәтте ретушлау

**РЕ́ТУШЬ** *ж* ретушь (*фотография негативтарын, рәсемдәрҙе һыҙмалап төҙәтеү*)

**РЕФЕРА́Т** *м* реферат; **писа́ть рефера́т** реферат яҙыу; **чита́ть рефера́т** реферат уҡыу

**РЕФЕРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое реферат …ы; **реферати́вный журна́л** рефераттар журналы

**РЕФЕРЕ́НДУМ** *м* референдум; **проводи́ть рефере́ндум** референдум үткәреү



11 зак. 2.0007.06

**РЕФЕРЕ́НТ** *м* референт (**1.** *реферат уҡыусы* **2.** *айырым мәсьәләләр буйынса кәңәш биргән, сығыштар әҙерләгән вазифалы кеше* **3.** *ғилми ойошмаларҙа директор секретары*)

**РЕФЕРЕ́НЦИЯ** *ж* референция (*элек эшләгән урындан алынған баһаламалы ҡағыҙ*)

**РЕ́ФЕРИ** и **РЕФЕРИ́** *м нескл.* рефери (*спорт ярышындағы судья*); **быть ре́фери** рефери булыу

**РЕФЕРИ́РОВАТЬ I** *сов., несов. что* реферат яҙыу; **рефери́ровать диссерта́цию** диссертацияның рефератын яҙыу

**РЕФЕРИ́РОВАТЬ II** *сов., несов.*; *спорт.* рефери булыу (*судьялыҡ итеү*); **рефери́ровать соревнова́ния** ярыштарҙа рефери булыу

**РЕФЛЕ́КС** *м* **1.** *физиол.* рефлекс; **безусло́вный рефле́кс** шартһыҙ рефлекс; **дви́гательный рефле́кс** хәрәкәт рефлексы; **усло́вный рефле́кс** шартлы рефлекс **2.** *книжн.* (*следствие*) һөҙөмтә, сағылыш; **рефле́кс реа́льной жи́зни** реаль тормош сағылышы

**РЕФЛЕКСИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое, *см.* **рефлекти́вный**

**РЕФЛЕ́КСИЯ** *ж*; *книжн.* рефлексия (*кешенең үҙ уй-фекерҙәрен, мауығыуҙарын, эмоцияларын һ.б. анализлау ынтылышы*)

**РЕФЛЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое рефлекс буйынса, ихтыярһыҙ; **рефлекти́вное движе́ние** ихтыярһыҙ хәрәкәт

**РЕФЛЕКТИ́РОВАТЬ** *несов.*; *физиол.* рефлекс биреү (*тышҡы тәьҫиргә яуап биреү*)

**РЕФЛЕ́КТОР** *м* рефлектор (**1.** *яҡтылыҡ нурҙарын сағылдырған батынҡы көҙгө* **2.** *яҡтылыҡ нурҙарын сағылдырған электр лампалы йылытҡыс прибор* **3.** *батынҡы көҙгөлө телескоп*)

**РЕФЛЕ́КТОРНЫЙ,** -ая, -ое рефлектор ...ы; **рефле́кторное зе́ркало** рефлектор көҙгөһө

**РЕФЛЕКТО́РНЫЙ,** -ая, -ое *физиол.* рефлекслы, ихтыярһыҙ; **рефлекто́рная реа́кция** ихтыярһыҙ реакция

**РЕФО́РМА** *ж* реформа; **де́нежная рефо́рма** аҡса реформаһы; **крестья́нская рефо́рма** крәҫтиән реформаһы; **рефо́рма правописа́ния** дөрөҫ яҙыуға реформа

**РЕФОРМА́ТОР** *м* реформатор, реформа үткәреүсе, үҙгәртеп ҡороусы; **реформа́торы исла́ма** ислам реформаторҙары

**РЕФОРМА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое реформатор(ҙар) ...ы, реформа ...ы; **реформа́торское направле́ние** реформаторҙар йүнәлеше

**РЕФОРМА́ЦИЯ** *ж*; *ист.* Реформация (*XVI б. Көнбайыш Европала католик сиркәүенә һәм папа власына ҡаршы дини көрәш формаһын алған феодализмға ҡаршы социаль-сәйәси хәрәкәт*)

**РЕФОРМИ́ЗМ** *м* реформизм; **тео́рия реформи́зма** реформизм теорияһы

**РЕФОРМИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* реформа яһау, реформа үткәреү, реформалау, үҙгәртеп ҡороу; **реформи́ровать управле́ние** идараны үҙгәртеп ҡороу

**РЕФОРМИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* реформа яһалыу (үткәрелеү), үҙгәреү **2.** *только несов. страд. от* **реформи́ровать**

**РЕФОРМИ́СТ** *м* реформасы (*реформа яҡлы кеше*)

**РЕФОРМИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое реформизм ...ы, реформистик, реформистар ...ы; **реформи́стская пози́ция** реформистик позиция; **реформи́стская програ́мма** реформизм программаһы; **реформи́стские па́ртии** реформистар фирҡәһе

**РЕФРАКТО́МЕТР** *м*; *физ.* рефрактометр (*төрлө есемдәрҙә нурҙың һыныу дәрәжәһен үлсәй торған прибор*)

**РЕФРА́КТОР** *м* рефрактор (*телескоп төрө*)

**РЕФРА́КЦИЯ** *ж*; *физ.* рефракция (*күк йөҙө есемдәренән килә торған яҡтылыҡ нурҙарының Ер атмосфераһы аша үткәндә һынып күренеүе*)

**РЕФРЕ́Н** *м* рефрен (**1.** *әҙ. шиғырҙың һәр бер строфаһынан һуң ҡабатланған юлдар* **2.** *муз. йыр ҡушымтаһы*)

**РЕФРИЖЕРА́ТОР** *м* рефрижератор (**1.** *һыуытҡыстарҙың түбән температура бирә торған өлөшө* **2.** *һыуытҡыс ҡоролмалар менән йыһазланған карап, вагон, машина һ.б.*)

**РЕХНУ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* аҡылдан яҙыу, тилереү

**РЕЦЕНЗЕ́НТ** *м* рецензент, баһалаусы, баһаламасы; **о́тзыв рецензе́нта** рецензент баһаламаһы

**РЕЦЕНЗИ́РОВАНИЕ** *с см.* **рецензи́ровать**; **рецензи́рование книг** китаптарҙы рецензиялау

**РЕЦЕНЗИ́РОВАТЬ** *несов. что* рецензиялау, баһалама яҙыу; **рецензи́ровать спекта́кль** спектаклде рецензиялау

**РЕЦЕНЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **рецензи́ровать**

**РЕЦЕ́НЗИЯ** *ж* баһалама, рецензия; **крити́ческая реце́нзия** тәнҡит баһаламаһы; **дать реце́нзию** баһалама биреү; **писа́ть реце́нзию** рецензия яҙыу

**РЕЦЕ́ПТ** *м* рецепт, өйрәтеү ысулы (**1.** *дарыу алырға бирелгән ҡағыҙ* **2.** *берәй нәмәне әҙерләү ысулы*); **реце́пт лека́рства** дарыу рецебы; **реце́пт ва́рки стекла́** быяла ҡайнатырға өйрәтеү ысулы

**РЕЦЕПТА́Р** *м* дарыу (дауа) яһаусы, рецептар; **рабо́та рецепта́ра** дарыу яһаусы эше

**РЕЦЕ́ПТНЫЙ,** -ая, -ое рецептар ...ы; **реце́птная кни́га** рецептар китабы

**РЕЦЕ́ПТОР** *м*; *физиол.* рецептор, нервы бөтөмө; **зри́тельный реце́птор** күреү рецепторы

**РЕЦЕПТУ́РА** *ж* рецептура; **рецепту́ра духо́в** хушбуйҙар рецептураһы; **рецепту́ра удобре́ний** ашламалар рецептураһы

**РЕЦЕПТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое рецепт(ар) ...ы, рецептура ...ы; **рецепту́рный спра́вочник** рецептар белешмәһе

**РЕЦИДИ́В** *м* ҡабатланыу, рецидив; **рециди́в боле́зни** ауырыу ҡабатланыу; **рециди́в преступле́ния** енәйәт ҡабатланыу

**РЕЦИДИВИ́СТ** *м* и **РЕЦИДИВИ́СТКА** *ж* рецидивист; **опа́сный рецидиви́ст** үтә ҡурҡыныс рецидивист

**РЕЧЕВО́Й,** -ая, -ое һөйләү ...ы, телмәр ...ы; **речево́е бога́тство** телмәр байлығы; **речевы́е на́выки** һөйләү күнекмәләре

**РЕЧЕ́НИЕ** *с* тапҡыр һүҙ, әйтелгән һүҙ

**РЕЧИ́ВОСТЬ** *ж* телдәрлек, һүҙсәнлек, һүҙгә әүәҫлек

**РЕЧИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* (*красноречивый*) оҫта телле, һүҙгә оҫта; **речи́стая де́вушка** оҫта телле ҡыҙ **2.** (*любящий поговорить*) һүҙсән, телдәр, һөйләнсек

**РЕЧИТАТИ́В** *м*; *муз.* речитатив, көйләп һөйләү

**РЕЧИТАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *муз.* речитатив ...ы, көйләп һөйләү ...ы; **речитати́вная часть** речитатив өлөшө

**РЕ́ЧКА** *ж* бәләкәй йылға, инеш, шишмә, ҡаран; **загороди́ть ре́чку** инеште кәртәләү

**РЕЧНИ́К** *м* йылғасы; **рабо́тать речнико́м** йылғасы булып эшләү

**РЕЧНО́Й,** -ая, -ое *в разн. знач.* йылға ...ы; **речно́й песо́к** йылға ҡомо; **речна́я ры́ба** йылға балығы; **речно́й тра́нспорт** йылға транспорты

**РЕЧУ́ШКА** *ж*; *разг.*, *уменьш.-ласк. от* **река́**, **ре́чка**; **ме́лкая речу́шка** һай ғына йылғасыҡ

**РЕЧЬ** *ж* **1.** һөйләү, телмәр, һүҙ; **бе́глая речь** тиҙ һөйләү; **же́стовая речь** ым менән һөйләү; **о́рганы ре́чи** телмәр ағзалары; **разви́тие ре́чи** телмәр үҫтереү **2.** тел; **у́стная речь** һөйләү теле; **кни́жная речь** китап теле **3.** һүҙ, һөйләшеү, әңгәмә; **об э́том не́ было и ре́чи** был турала һүҙ булғаны ла юҡ; **пусты́е ре́чи** буш һүҙҙәр **4.** телмәр; **юбиле́йная речь** юбилей телмәре; **речь прокуро́ра** прокурор телмәре ♦ **ко́свенная речь** *см.* **ко́свенный**; **пряма́я речь** *см.* **прямо́й**; **ча́сти ре́чи** *см.* **часть**; **вести́ речь** *см.* **вести́**

**РЕША́ТЬ** *несов. см.* **реши́ть**

**РЕША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **реши́ться** **2.** *страд. от* **реша́ть**

**РЕША́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **реша́ть** **2.** *прил.* төп, мөһим, хәл иткес; **реша́ющая си́ла** төп көс; **реша́ющая мину́та** хәл иткес минут; **реша́ющий уча́сток произво́дства** етештереүҙең мөһим тармағы

**РЕШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **реши́ть**; **реше́ние зада́чи** мәсьәлә сисеү **2.** ҡарар, нәтижә; **прийти́ к реше́нию** ҡарарға килеү **3.** (*постановление*) ҡарар, хөкөм; **реше́ние суда́** суд хөкөмө; **реше́ние собра́ния** йыйылыш ҡарары **4.** сиселеш, яуап; **реше́ние зада́чи** мәсьәләнең яуабы

**РЕШЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **реши́ть** **2.** *прил.* хәл ителгән, сиселгән, ҡарарға киленгән; **решённое де́ло** хәл ителгән эш

**РЕШЕ́ТИНА** *ж* рәшәткә таҡтаһы

**РЕШЕ́ТИТЬ** *несов. что*; *спец.* (*прибивать решетник*) рәшәткәләү, кәртәләү

**РЕШЕТИ́ТЬ** *несов. что*; *разг.* (*дырявить*) тишкеләп (селтәрләп) бөтөрөү

**РЕШЁТКА** *ж* **1.** рәшәткә; **садо́вая решётка** баҡса рәшәткәһе **2.** (*ажурное плетение*) селтәр ♦ **за решётку сесть (посади́ть)** төрмәгә ултырыу (ултыртыу); **за решёткой (сиде́ть, оказа́ться и т.п.)** төрмәлә ултырыу

**РЕШЕ́ТНИК I** *м собир.*; *спец.* аралыҡ һайғауы (*такта, брус һ.б.*)

**РЕШЕ́ТНИК II** *м* (*тот, кто изготовляет решёта*) иләксе, иләк оҫтаһы

**РЕШЁТНЫЙ,** -ая, -ое иләк ...ы; **решётный о́бод** иләк тирәсе

**РЕШЕТО́** *с* иләк; **решето́ из лы́ка** йүкә иләк ♦ **голова́ как решето́** серек баш; **чудеса́ в решете́** ғәжәп нәмә, иҫ киткес мәрәкә; **носи́ть решето́м во́ду** *см.* **вода́**

**РЕШЁТЧАТЫЙ** и **РЕШЕ́ТЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** рәшәткә; **реше́тчатый забо́р** рәшәткә ҡойма **2.** (*загороженный решёткой*) рәшәткәле, селтәрле; **решётчатое окно́** рәшәткәле тәҙрә

**РЕШИ́МОСТЬ** *ж* тәүәккәллек; **прояви́ть реши́мость** тәүәккәллек күрһәтеү

**РЕШИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* **1.** тәүәккәл, ҡыйыу, батыр; **реши́тельно бра́ться за де́ло** эшкә тәүәккәл тотоноу **2.** (*совсем, совершенно*) -ла/-лә, һис, бөтөнләй, тулыһынса; **я реши́тельно ничего́ не понима́ю** мин бөтөнләй бер нәмә лә аңламайым **3.** (*без исключения*) -ла/-лә, ҡатғи, ҡатғи рәүештә; **в э́том уча́ствуют реши́тельно все** бында ҡатғи рәүештә бөтәһе лә ҡатнаша

**РЕШИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** тәүәккәллек, ҡыйыулыҡ, баҙнатлыҡ; **прояви́ть реши́тельность** тәүәккәллек күрһәтеү **2.** ҡатғилек, киҫкенлек; **реши́тельность го́лоса** тауыштың ҡатғилеге

**РЕШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәүәккәл, ҡыйыу; **реши́тельный челове́к** тәүәккәл кеше **2.** (*крайний*) ҡатғи, киҫкен; **реши́тельные ме́ры** ҡатғи саралар **3.** (*решающий*) хәл иткес, мөһим; **реши́тельные собы́тия** мөһим ваҡиғалар; **реши́тельный шаг** хәл иткес аҙым

**РЕШИ́ТЬ** *сов.* **1.** *с неопр.* -ырға/-ергә булыу, ҡарар итеү (ҡылыу); **я реши́л оста́ться до́ма** мин өйҙә ҡалырға булдым **2.** *что* и *с неопр.* ҡарар итеү (сығарыу); **суд реши́л де́ло в его́ по́льзу** эш буйынса суд уның файҙаһына ҡарар сығарҙы; **реши́ть созва́ть собра́ние** йыйылыш йыйырға ҡарар итеү **3.** *что* (*найти разрешение чему-л.*) хәл итеү; **реши́ть вопро́с** мәсьәләне хәл итеү **4.** *что* (*найти ответ*) сығарыу, сисеү, яуабын табыу; **реши́ть зада́чу** мәсьәлә сисеү; **реши́ть кроссво́рд** кроссворд сисеү ♦ **решено́ и подпи́сано** хәл ителгән

**РЕШИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *на что* и *с неопр.* -ырға/-ергә, -ға/-гә булыу, ҡарарға килеү,

тәүәккәлләү, баҙнат (батырсылыҡ) итеү; **реши́ться е́хать** барырға булыу; **реши́ться на штурм** штурмға батырсылыҡ итеү **2.** хәл ителеү, сиселеү; **за́втра реши́тся моё де́ло** иртәгә минең эшем хәл ителәсәк **3.** *прост.* (*лишиться чего-л.*) юғалтыу, яҙыу; **он сна реши́лся** ул йоҡоһонан яҙҙы ♦ **реши́ться жи́зни** *прост.* үлеү

**РЕЭВАКУАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое эвакуациянан ҡайтарыу ...ы; **реэвакуацио́нная коми́ссия** эвакуациянан ҡайтарыу комиссияһы

**РЕЭВАКУА́ЦИЯ** *ж* эвакуациянан ҡайтарыу; **реэвакуа́ция заво́да** заводты эвакуациянан ҡайтарыу

**РЕЭВАКУИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* эвакуациянан ҡайтарыу; **реэвакуи́ровать населе́ние** халыҡты эвакуациянан ҡайтарыу

**РЕЭВАКУИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* эвакуациянан ҡайтыу, кире ҡайтыу **2.** *несов. страд. от* **реэвакуи́ровать**

**РЕЭ́КСПОРТ** *м* реэкспорт (*ситтән ингән тауарҙы экспортҡа сығарыу*)

**РЕЭМИГРА́НТ** *м* и **РЕЭМИГРА́НТКА** *ж* реэмигрант, эмиграциянан ҡайтыусы

**РЕЭМИГРА́ЦИЯ** *ж* эмиграциянан ҡайтыу (ҡайтарыу)

**РЕ́ЯТЬ** *несов.* **1.** һалмаҡ ҡына йөҙөү (осоу); **ча́йки ре́ют над мо́рем** аҡсарлаҡтар диңгеҙ өҫтөндә һалмаҡ ҡына оса; **ко́ршун ре́ял в вышине́** төйләгән һалмаҡ ҡына оса ине **2.** елберләү, елберләп тороу; **ре́ют знамёна** байраҡтар елберләй

**РЖА́ВЕТЬ** и **РЖАВЕ́ТЬ** *несов.* тутығыу, тут баҫыу; **желе́зо ржа́веет** тимер тутыға

**РЖА́ВИТЬ** *несов. что* тутыҡтырыу; **сы́рость ржа́вит желе́зо** дым тимерҙе тутыҡтыра

**РЖА́ВОСТЬ** *ж* тутыҡҡанлыҡ, тутлы булыу

**РЖА́ВЧИНА** *ж* **1.** *в разн. знач.* тут, тутыҡ; **покры́ться ржа́вчиной** тутыҡ менән ҡапланыу; **ржа́вчина на воде́** һыуҙағы тут **2.** (*буро-жёлтые пятна, появляющиеся в результате окисления жира*) ыржа, тут (*сир*); **ржа́вчина на селёдке** селёдка туты

**РЖА́ВЧИННИК** *м* тут бәшмәге

**РЖА́ВЧИННЫЙ,** -ая, -ое тут, тутыҡ ♦ **ржа́вчинные грибы́** *бот.* тут бәшмәктәре

**РЖА́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* тутыҡҡан, тутлы, тутыҡ; **ржа́вое желе́зо** тутыҡ тимер; **ржа́вый нож** тутлы бысаҡ; **ржа́вая вода́** тутлы һыу **2.** (*красно-бурый — о цвете*) ҡыҙғылт көрән (төҫтәге); **шля́па ржа́вого цве́та** ҡыҙғылт көрән төҫтәге эшләпә

**РЖА́НИЕ** *с* **1.** кешнәү; **послы́шалось ржа́ние коне́й** аттар кешнәүе ишетелде **2.** *прост.* (*громкий хохот*) иһаһайлау, хахылдау, кешнәү

**РЖАНО́Й,** -ая, -ое арыш ...ы; **ржана́я мука́** арыш оно; **ржано́й хлеб** арыш икмәге

**РЖАТЬ** *несов.* **1.** кешнәү; **ло́шади ржут** аттар кешнәй **2.** *прост.* кешнәү, иһаһайлау, хахылдау

**РИА́Л** *м* риал (*Иран аҡса берәмеге*)

**РИ́ГА** *ж* япма, лапаҫ; **суши́ть хлеб в ри́ге** игенде лапаҫта киптереү

**РИ́ГЕЛЬ** *м*; *тех.* **1.** арҡыры урҙа **2.** (*задвижка*) шылдырма, шыуҙырма

**РИДИКЮ́ЛЬ** *м*; *уст.* ридикюль (*ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡул сумкаһы*); **ко́жаный ридикю́ль** күн ридикюль

**РИ́ЗА** *ж* **1.** *церк.* риза (*христиан руханиҙарының ғибәҙәт ваҡытында кейә торған өҫ кейеме*) **2.** *уст.*, *трад.-поэт.* (*одеяние*) кейем

**РИЗО́ИДЫ** *мн.* (*ед.* **ризо́ид** *м*); *биол.* ризоидтар (*ҡайһы бер үҫемлектәрҙә тамыр хеҙмәтен үтәй торған төктәр*)

**РИКОШЕ́Т** *м* **1.** рикошет, ҡаҡсыу, ҡаҡлығыу **2.** *в знач. нареч.* **рикоше́том** ҡаҡсып, ҡаҡлығып; **пу́ля попа́ла в него́ рикоше́том** пуля уға ҡаҡсып килеп тейгән **3.** *в знач. нареч.* **рикоше́том**; *перен.* (*косвенным образом*) ситләтеп, ҡыялатып

**РИКОШЕТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* ҡаҡсыу, ҡаҡлығыу; **пу́ли рикошети́ровали от камне́й** пулялар таштан ҡаҡлыҡты

**РИКОШЕ́ТИТЬ** *несов.*; *разг. см.* **рикошети́ровать**

**РИ́КША 1.** *м* рикша (*ҡайһы бер Көнсығыш һәм Көньяҡ Азия илдәрендә бәләкәй арбаға егелеп, пассажирҙар йөрөтөүсе, йөк ташыусы кеше*) **2.** *ж* рикша (*арба*)

**РИ́МЛЯНЕ** *мн.* **1.** *ист.* римляндар (*Боронғо Рим дәүләте граждандары*) **2.** римлылар (*Римда йәшәүселәр*) // *ед.* **ри́млянин** *м* Римда йәшәүсе ир-ат; **ри́млянка** *ж* Римда йәшәүсе ҡатын-ҡыҙ

**РИ́МСКИЙ: Па́па Ри́мский** Рим папаһы; **ри́мское пра́во** *юр.* Боронғо Рим хоҡуғы; **ри́мские ци́фры** Боронғо Рим һандары (*I*, *II*, *III һ.б.*)

**РИНГ** *м*; *спорт.* ринг (*бокс ярышы майҙаны*); **боксёр вы́шел на ринг** боксёр рингыға сыҡты

**РИ́НУТЬСЯ** *сов.* ташланыу, атылыу; **ри́нуться в бой** һуғышҡа ташланыу

**РИС** *м* дөгө; **се́ять рис** дөгө сәсеү

**РИСК** *м* **1.** ҡурҡыныс, хәүеф, хәтәр; **с ри́ском для жи́зни** ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып **2.** тәүәккәллек, ҡыйыулыҡ; **у́мный риск** аҡыллы тәүәккәллек ♦ **на свой страх и риск** *см.* **страх**

**РИСКНУ́ТЬ** *сов.* **рискова́ть**; **рискну́ть спроси́ть** һорарға батырсылыҡ итеү

**РИСКО́ВАННОСТЬ** *ж* **1.** ҡурҡыныслыҡ, хәүефлек, хәтәрлек; **риско́ванность посту́пка** (эшләнгән) эштең хәтәрлеге **2.** тәүәккәллек, ҡыйыулыҡ

**РИСКО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*опасный*) ҡурҡынычлы, хәүефле, хәтәр; **риско́ванное де́ло** хәүефле эш **2.** (*требующий смелости, бесстрашия*) бик ҡыйыу, тәүәккәл; **риско́ванный шаг** тәүәккәл аҙым **3.** *перен.* (*двусмысленный*) ике төрлө мәғәнәле, ике төрлө аңларлыҡ, әҙәпһеҙ һаналған, килешмәгән; **риско́ванное выраже́ние** ике төрлө аңларлыҡ әйтем

**РИСКОВА́ТЬ** *несов.* **1.** тәүәккәлләү, баҙнат (батырсылыҡ) итеү **2.** *чем* ҡурҡыныс аҫтына

ҡуйыу; **рискова́ть свои́м здоро́вьем** сәләмәтлегеңде ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыу **3.** *с неопр.* мөмкин (ихтимал) булыу, ҡурҡыныс булыу; **он риску́ет опозда́ть** уның һуңлап ҡуйыуы мөмкин

**РИСКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *прост. см.* **риско́ванный** 1, 2

**РИ́СЛИНГ** *м* рислинг (**1.** *йөҙөм сорты* **2.** *аҡ шарап*)

**РИСОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һүрәт төшөрөү ...ы, рәсем төшөрөү (яһау) ...ы; **рисова́льные принадле́жности** һүрәт төшөрөү кәрәк-яраҡтары

**РИСОВА́ЛЬЩИК** *м* и **РИСОВА́ЛЬЩИЦА** *ж* һүрәт төшөрөү оҫтаһы, һүрәтсе

**РИСОВА́НИЕ** *с см.* **рисова́ть**; **уро́к рисова́ния** рәсем дәресе; **тетра́дь по рисова́нию** рәсем дәфтәре

**РИСОВА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** һүрәткә (рәсем) төшөрөү, һүрәт яһау; **рисова́ть приро́ду** тәбиғәтте һүрәткә төшөрөү; **рисова́ть карандашо́м** ҡәләм менән рәсем төшөрөү **2.** *перен.* (*описывать в словесной форме*) һүрәтләү, тасуир итеү

**РИСОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** күренеү, күренеп тороу; **вдали́ рисова́лись го́ры** алыҫтан тауҙар күренә ине **2.** *перен.* (*представляться в воображении*) күҙ алдына килеү (баҫыу), хыялда һүрәтләнеү **3.** *чем* и *без доп.* ҡыланыу, булып күренергә (салынырға) тырышыу; **рисова́ться на лю́дях** кешеләр алдында ҡыланыу **4.** *страд. от* **рисова́ть**

**РИСОВО́Д** *м* дөгө үҫтереүсе

**РИСОВО́ДСТВО** *с* дөгөсөлөк, дөгө үҫтереү; **занима́ться рисово́дством** дөгө үҫтереү менән шөғөлләнеү

**РИСОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое дөгө үҫтереү (эшкәртеү) менән шөғөлләнгән; **рисово́дческий райо́н** дөгө үҫтереү менән шөғөлләнгән район

**РИ́СОВЫЙ,** -ая, -ое дөгө ...ы; **ри́совая ка́ша** дөгө бутҡаһы; **ри́совая крупа́** дөгө ярмаһы; **ри́совое по́ле** дөгө баҫыуы ♦ **ри́совая бума́га** дөгө һаламынан эшләнгән йоҡа ҡағыҙ

**РИСУ́НОК** *м* **1.** һүрәт, рәсем; **акваре́льный рису́нок** акварель һүрәт; **де́лать рису́нки** рәсемдәр яһау; **рису́нок челове́ка** кеше һүрәте **2.** (*очертания*) һыҙат, һыҙатланыш; **рису́нок гор** тауҙар һыҙатланышы **3.** (*узор*) биҙәк **4.** *перен.* кәүҙәләнеш; **рису́нок ро́ли** ролдәге кәүҙәләнеш

**РИСУ́НОЧНЫЙ,** -ая, -ое һүрәт ...ы, рәсем ...ы

**РИСУ́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое һүрәтле, биҙәкле, рәсемле; **рису́нчатая ткань** биҙәкле тауар

**РИТМ** *м*; *прям., перен.* ритм; **ритм стиха́** шиғыр ритмы; **ритм движе́ний** хәрәкәт ритмы; **ритм рабо́ты** эш ритмы

**РИТМИЗА́ЦИЯ** *ж* ритмлау, ритмға һалыу; **ритмиза́ция движе́ний** хәрәкәттәрҙе ритмға һалыу

**РИТМИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* ритмға һалыу, ритмлаштырыу; **ритмизи́ровать де́йствие** хәрәкәтте ритмға һалыу

**РИ́ТМИКА** *ж*; *в разн. знач.* ритмика; **ри́тмика стиха́** шиғыр ритмикаһы; **уро́к ри́тмики** ритмика дәресе

**РИТМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ритмик, ритмлы; **ритми́ческие движе́ния** ритмик хәрәкәттәр; **ритми́ческая му́зыка** ритмлы музыка

**РИТМИ́ЧНОСТЬ** *ж* ритмлылыҡ; **ритми́чность рабо́ты** эштең ритмлылығы

**РИТМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **ритми́ческий**; **ритми́чное бие́ние се́рдца** йөрәктең ритмлы һуғыуы

**РИТОРИ́ЗМ** *м*; *книжн. см.* **ритори́чность**

**РИТО́РИКА** *ж* риторика (**1.** *ораторлыҡ, матур һөйләү оҫталығы тураһындағы теория* **2.** *кцсм. артыҡ ҡабартып һөйләнелгән һүҙҙәр*); **преподава́ть рито́рику** риторика уҡытыу; **то́нкости рито́рики** риторика нескәлектәре

**РИТОРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое риторик; **ритори́ческая речь** риторик телмәр; **ритори́ческий вопро́с** риторик һорау

**РИТОРИ́ЧНОСТЬ** *ж*; *книжн.* риториклыҡ; **ритори́чность фра́зы** фразаның риториклығы

**РИТОРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* риторикаға ҡоролған, риторика менән һуғарылған; **ритори́чная пье́са** риторика менән һуғарылған пьеса

**РИТУА́Л** *м* йола, ритуал, ғөрөф-ғәҙәт; **сва́дебный ритуа́л** туй йолаһы; **ритуа́л погребе́ния** ерләү йолаһы

**РИТУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ритуал ...ы, йола ...ы; **ритуа́льная торже́ственность** йола тантаналылығы

**РИФ I** *м* (*подводные скалы*) риф; **кора́лловые ри́фы** мәрйен рифтары

**РИФ II** *м*; *мор.* риф (*көслө ел ваҡытында елкәнде бәләкәйләтеү өсөн арҡыры тағылған бау*) ♦ **брать (взять) ри́фы** елкән бәләкәйләтеү

**РИ́ФИТЬ** *несов. что*; *мор.* елкәндәрҙе бәләкәйләтеү (бәләкәсәйтеү, йыйыу) (*риф ярҙамында*)

**РИФЛЕ́НИЕ** *с*; *тех.* (йөҙөн) ҡытыршылау, бызырмаҡлау, һырлау

**РИФЛЁНЫЙ I,** -ая, -ое *тех.* ҡытыршы, бызырмаҡлы, һырлы; **рифлёное желе́зо** һырлы тимер; **рифлёное стекло́** бызырмаҡлы быяла

**РИФЛЁНЫЙ II,** -ая, -ое *мор.* (*о парусах*) бәләкәсәйтелгән, бәләкәйләтелгән, йыйылған

**РИ́ФЛИ** *мн.*; *тех.* һыр, бызырмаҡ, быжыртмаҡ

**РИ́ФМА** *ж* рифма; **перекрёстная ри́фма** аралаш рифма ♦ **же́нская ри́фма** *лит.* ҡатын-ҡыҙҙар рифмаһы (*баҫым һуңғы ижек алдындағы ижеккә төшкән рифма*); **мужска́я ри́фма** *лит.* ирҙәр рифмаһы (*баҫым һуңғы ижеккә төшкән рифма*)

**РИФМА́Ч** *м*; *разг., пренебр.* шағир йораты (шәрәмәте)

**РИФМО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. страд. от* **рифмова́ть 2.** *прил.* рифмалы; **рифмо́ванная пе́сня** рифмалы йыр

**РИФМОВА́ТЬ** *несов. что* рифмалау, рифмаға һалыу; **рифмова́ть слова́** һүҙҙәрҙе рифмалау

**РИФМОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** рифмалашыу; **слова́ рифму́ются** һүҙҙәр рифмалаша **2.** *страд. от* **рифмова́ть**

**РИФМОПЛЁТ** *м*; *разг., пренебр. см.* **рифма́ч**

**РИХТОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* турайта (төҙәйтә, тигеҙләй) торған; **рихтова́льный молото́к** төҙәйтә торған сүкеш

**РИХТОВА́ТЬ** *несов. что*; *тех.* (*выпрямлять*) турайтыу, төҙәйтеү, тигеҙләү

**РИХТОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **рихтова́ть**

**РИХТО́ВКА** *ж*; *тех. см.* **рихтова́ть**

**РИШЕЛЬЕ́** *с нескл.* селтәрләп сигеү

**РО́БА** *ж*; *спец.* (*грубая рабочая одежда*) кейем, эш кейеме, махсус кейем; **рыба́цкая ро́ба** балыҡсылар кейеме

**РОБЕ́ТЬ** *несов.* ҡурҡыу, ҡаушау, шөрләү; **робе́ть пе́ред учи́телем** уҡытыусы алдында ҡаушау

**РО́БКИЙ,** -ая, -ое ҡурҡаҡ, баҙнатһыҙ, ҡыйыуһыҙ, оялсан; **ро́бкий взгляд** ҡыйыуһыҙ ҡараш ♦ **не ро́бкого деся́тка** ҡурҡаҡтарҙан түгел, ҡыйыу йөрәкле

**РО́БОСТЬ** *ж* ҡурҡаҡлыҡ, баҙнатһыҙлыҡ, ҡыйыуһыҙлыҡ; **испы́тывать ро́бость** ҡыйыуһыҙлыҡ тойоу

**РО́БОТ** *м* робот (*техник операциялар башҡарғанда кешене алмаштыра торған автомат*)

**РОВ** *м* соҡор, ур; **противота́нковый ров** танкыға ҡаршы ҡаҙылған ур; **вы́копать ров** соҡор ҡаҙыу

**РОВЕ́СНИК** *м* и **РОВЕ́СНИЦА** *ж* йәштәш, тиҫтер, ҡорҙаш; **он мой рове́сник** ул минең йәштәшем

**РО́ВИК** *м* **1.** бәләкәй соҡор, соҡорсоҡ **2.** *воен.* туп соҡоро

**РО́ВНО 1.** *нареч.* (*гладко*) тигеҙ, тип-тигеҙ; **идёт ро́вно** тип-тигеҙ бара **2.** *нареч.* (*прямо*) тура, төҙ; **провести́ ли́нию ро́вно** һыҙыҡты төҙ үткәреү **3.** *нареч.* (*одинаково*) (бер) тигеҙ (төрлө), тиң; **дыша́ть ро́вно** тигеҙ тын алыу **4.** *нареч.*; *перен.* (*уравновешенно*) тыныс, сабыр **5.** *в знач. частицы* (*точно, как раз*) теүәл, тап, нәҡ; **ро́вно три ме́сяца** теүәл өс ай; **ро́вно сто рубле́й** теүәл йөҙ һум **6.** *в знач. частицы*; *разг.* (*совершенно, совсем*) бер нәмә лә, һис нәмә; **ро́вно ничего́ не поня́ть** бер нәмә лә аңламау

**РО́ВНОСТЬ** *ж* **1.** тигеҙлек, туралыҡ, төҙлөк; **ро́вность ли́нии** һыҙыҡтың туралығы **2.** *перен.* тыныслыҡ, сабырлыҡ; **ро́вность го́лоса** тауыштың тыныслығы; **ро́вность хара́ктера** холоҡтоң сабырлығы

**РО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*гладкий*) тигеҙ, тип-тигеҙ; **ро́вная степь** тип-тигеҙ дала **2.** (*прямой*) тура, төҙ; **ро́вная ли́ния** тура һыҙыҡ **3.** (*одинаковый*) бер тигеҙ (төрлө), тиң; **ро́вные зу́бы** бер тигеҙ тештәр **4.** (*равномерный*) бер тигеҙ, бер төрлө, берҙәй; **ро́вный го́лос** бер тигеҙ тауыш; **ро́вный шаг** бер тигеҙ аҙым **5.** *перен.* (*уравновешенный*) тыныс, сабыр; **ро́вный хара́ктер** сабыр холоҡ ♦ **ро́вным счётом** тигеҙ иҫәп; **ро́вным счётом ничего́** бер нәмә лә юҡ; **не ро́вен (не ровён) час** *прост.* булмаҫ тимә, булыр ул (*хәүеф белдергәндә әйтелә*)

**РО́ВНЯ** и **РОВНЯ́** *м* и *ж*; *разг.* иш, тиң, бер иш (тиң, тигеҙ); **я ей не ро́вня** мин уға тиң түгел

**РОВНЯ́ТЬ** *несов. что* тигеҙләү, таҡырайтыу; **ровня́ть площа́дку** майҙансыҡты тигеҙләү

**РОВНЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **ровня́ть**

**РОГ** м **1.** мөгөҙ; **оле́ний рог** болан мөгөҙө **2.** борғо; **охо́тничий рог** һунарсы борғоһо; **пасту́шеский рог** көтөүсе борғоһо; **труби́ть в рог** борғо ҡысҡыртыу ♦ **наста́вить рога́** иргә хыянат итеү; **облома́ть (сломи́ть) рога́** *кому* бөгөп алыу, һындырыу; **брать (взять) быка́ за рога́** *см.* **брать**; **в бара́ний рог согну́ть (скрути́ть)** *см.* **бара́ний**; **как из ро́га изоби́лия** мул, бик күп

**РОГА́ЛИК** *м* (*маленькая булочка, имеющая форму рога*) асығауыҙ

**РОГА́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҙур мөгөҙлө; **рога́стый бык** ҙур мөгөҙлө үгеҙ

**РОГА́ТИНА** *ж* айыу һөңгөһө

**РОГА́ТКА** ж **1.** кәртә; **ста́вить рога́тки** кәртә ҡуйыу **2.** *обычно мн.* **рога́тки**; *перен.* кәртә, тотҡарлыҡ, ҡаршылыҡ; **рога́тки цензу́ры** цензура тотҡарлыҡтары **3.** ағас ҡамытса **4.** сөйөртмәк, атҡыс, һиртмәк; **рога́тка с рези́нкой** һуҙылмаҡлы сөйөртмәк

**РОГА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** мөгөҙлө; **рога́тая голова́** мөгөҙлө баш **2.** мөгөҙ һымаҡ, ураҡ һымаҡ; **рога́тый ме́сяц** ураҡ һымаҡ ай **3.** *разг.* алданған (ҡатыны хыянат иткән) ир

**РОГА́Ч** *м* **1.** (*самец оленя*) ата болан **2.** (*жук*) болан ҡуңыҙ, мөгөҙлө ҡуңыҙ **3.** тоткос

**РОГОВИ́ЦА** *ж*; *анат.* мөгөҙсә (*күҙҙең мөгөҙсә шекәрәһе*), мөгөҙ ҡатлау

**РОГОВО́Й,** -ая, -ое **1.** мөгөҙ ...ы; **нож с рогово́й рукоя́ткой** мөгөҙ һаплы бысаҡ; **рогово́й гре́бень** мөгөҙ тараҡ **2.** борғо ...ы; **рогова́я му́зыка** борғо музыкаһы ♦ **рогова́я оболо́чка** *анат.* мөгөҙсә, мөгөҙ ҡатлау

**РОГО́ЖА** *ж* септә; **накры́ть рого́жей** септә менән ябыу; **ткать рого́жу** септә һуғыу

**РОГО́ЖКА** *ж* **1.** бәләкәй септә **2.** (*ткань*) бүртмәс (*киндер йәки етен туҡыма*); **брю́ки из рого́жки** бүртмәс салбар

**РОГО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое септә; **рого́жное произво́дство** септә етештереү; **рого́жный куль** септә ҡап (тоҡ)

**РОГО́З** *м* и **РОГОЗА́** *ж* екән, екәнле ҡамыш; **рого́з широколи́стный** яҫы япраҡ екән

**РОГО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое екән ...ы; **рого́зное се́мя** екән орлоғо

**РОГОНО́СЕЦ** *м*; *разг.* алданған (ҡатыны хыянат иткән) ир

**РОД** *м* **1.** ырыу, түбә, иләү; **глава́ ро́да** ырыу башлығы; **быть из одного́ ро́да** бер ырыуҙан булыу; **обы́чай ро́да** ырыу йолаһы **2.** зат, иләү, енес, тоҡом, нәҫел, зат-ырыу, нәҫел-нәсәп, орпаҡ, тамыр; **табы́нский род** табын иләүе; **зна́тный род** күренекле нәҫел; **како́го ро́да** заты ниндәй **3.** *в знач. нареч.* **ро́дом** сығышы (тыумышы)

яғынан (менән); **он ро́дом из Башкортоста́на** ул сығышы менән Башҡортостандан **4.** *биол.* төркөм, ырыу, төр; **разделе́ние на ро́ды** төрҙәргә бүлеүеш; **ро́ды расте́ний** үҫемлек төрҙәре **5.** төр, сорт; **род ору́жия** ҡорал төрө **6.** (*образ, характер деятельности*) шөғөл **7.** *лингв.* енес ♦ **род людско́й (челове́ческий)** әҙәм заты, кешелек; **в не́котором ро́де** бер ни тиклем, бер ни ҡәҙәр; **в своём ро́де** үҙенсә, үҙенә күрә (башҡа); **в э́том ро́де** шундайыраҡ, шулайыраҡ, шуға яҡын; **о́т роду** тыуғандан бирле, тыумыштан; **своего́ ро́да** үҙенә күрә; **тако́го ро́да** шундай, уның кеүек; **без ро́ду и пле́мени** зат-ырыуһыҙ, нәҫел-нәсәпһеҙ; **на роду́ напи́сано** маңлайына яҙылған; **ни ро́ду ни пле́мени** япа-яңғыҙ

**РО́ДИЙ** *м* родий (*химик элемент, металл*)

**РОДИ́ЛЬНИЦА** *ж* бәпесләгән (бала тапҡан) ҡатын

**РОДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бәпесләү ...ы, бала табыу ...ы; **роди́льное отделе́ние больни́цы** хәстәхананың бәпесләү бүлеге; **роди́льный дом** бала табыу йорто **2.** бәпесләгәндә була торған; **роди́льная горя́чка** бәпесләгәндә була торған тапма

**РОДИ́МЧИК** *м*; *разг.* (*болезненный припадок*) быума (*балаларҙа*); тулғаҡ, тулғаҡ тотоу (*йөклө ҡатындарҙа*)

**РОДИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** тыуған, үҙ; **роди́мая земля́** тыуған ер; **роди́мый край** тыуған яҡ **2.** *в знач. сущ.* **роди́мый** *м* и **роди́мая** *ж* (*в обращении*) туғанҡай, йөрәккәй, бәғерем, ҡәҙерлем, һөйөклөм **3.** *в знач. сущ.* **роди́мые** *мн.* (*родители, родные*) ата-әсәләр ♦ **роди́мое пятно́**: 1) (ҡыҙыл) миң (тап); 2) *чего*; *перен.* иҫкелек ҡалдығы

**РО́ДИНА** *ж* **1.** *высок.* (*Отечество*) Тыуған ил, Ватан; **защища́ть Ро́дину** Тыуған илде һаҡлау; **служи́ть Ро́дине** Ватанға хеҙмәт итеү **2.** (*место рождения кого-л.*) тыуған ер, тыуған яҡ; **прие́хать на ро́дину** тыуған яҡҡа ҡайтыу **3.** (*место возникновения чего-л.*) тыуған (барлыҡҡа килгән, килеп сыҡҡан) ер

**РО́ДИНКА** *ж* миң; **больша́я ро́динка** ҙур миң

**РОДИ́НЫ** *мн.*; *уст.* **1.** бәпәй туйы **2.** *см.* **ро́ды**

**РОДИ́ТЕЛИ** *мн.* ата-әсә(ләр); **помога́ть роди́телям** ата-әсәләргә ярҙам итеү

**РОДИ́ТЕЛЬ** *м*; *уст.*, *прост.* атай, ата; **роди́тельница** *ж*; *уст.*, *прост.* әсәй, әсә

**РОДИ́ТЕЛЬНЫЙ: роди́тельный паде́ж** *грам.* эйәлек килеш

**РОДИ́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое ата-әсә(ләр) ...ы; **роди́тельская забо́та** ата-әсә хәстәре; **роди́тельский комите́т** ата-әсәләр комитеты; **роди́тельское собра́ние** ата-әсәләр йыйылышы

**РОДИ́ТЬ** *сов.*, *несов.* **1.** *кого-что* тыуҙырыу, бәпесләү, табыу; **роди́ть ребёнка** бала табыу **2.** *что*; *перен.* барлыҡҡа килтереү, килтереп сығарыу, яратыу, тыуҙырыу; **ум пра́вду роди́т** аҡыл хәҡиҡәтте тыуҙыра **3.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*давать плоды, урожай*) уңыш (емеш) биреү ♦ **в чём мать родила́** инәнән тыума (*шыр яланғас*)

**РОДИ́ТЬСЯ** *сов.*, *несов.* **1.** тыуыу; **роди́лся ребёнок** бала тыуҙы **2.** *перен.* (барлыҡҡа) килеү, тыуыу, яралыу; **родила́сь блестя́щая иде́я** бына тигән фекер тыуҙы **3.** үҫеү, уңыу, уңыш (емеш) биреү; **пшени́ца родила́сь хорошо́** бойҙай яҡшы уңыш бирҙе ♦ **роди́ться в соро́чке (в руба́шке)** бәхетле булып тыуыу; **роди́ться под счастли́вой звездо́й** *см.* **звезда́**

**РО́ДИЧ** *м* **1.** *ист.* ырыуҙаш; **быть ро́дичами** ырыуҙаш булыу **2.** *прост.* ҡәрҙәш, туған, туған-ырыу, туған-тыумаса; **бли́жние и да́льние ро́дичи** яҡын һәм алыҫ туғандар

**РОДНИ́К** *м*; *прям.*, *перен.* шишмә, инеш, күҙәү, сығанаҡ, ҡаран; **го́рный родни́к** тау шишмәһе; **родни́к вдохнове́ния** илһам шишмәһе

**РОДНИКО́ВЫЙ,** -ая, -ое шишмә ...ы, инеш ...ы; **роднико́вая вода́** шишмә һыуы

**РОДНИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** туғанлаштырыу, туғанлыҡ (ҡәрҙәшлек) урынлаштырыу **2.** (*сближать*) яҡынлаштырыу, яҡынайтыу, яҡын итеү; **нас родни́ла пе́сня** беҙҙе йыр яҡынайтты

**РОДНИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** туғанлашыу, туған (ҡәрҙәш) булышыу, ҡоҙа булышыу, ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү; **родни́ться с семьёй дру́га** дуҫтың ғаиләһе менән туғанлашыу **2.** яҡынайыу, яҡынлашыу, яҡын булыу; **ду́ши их родни́лись** уларҙың күңелдәре яҡынайҙы

**РОДНИЧО́К I** *м*; *уменьш.-ласк. от* **родни́к**

**РОДНИЧО́К II** *м*; *анат.* лепкә; **за́дний родничо́к** артҡы (кесе) лепкә; **клинови́дный родничо́к** сөй лепкә (*колаҡ алды өлкәһендә*); **пере́дний родничо́к** алғы (ҙур) лепкә

**РОДНО́Й,** -ая, -ое **1.** бер туған; **родно́й брат** бер туған ағай; **родна́я сестра́** бер туған апай **2.** *в знач. сущ.* **родны́е** *мн.* туғандар, ағай-эне, ҡәрҙәш-ырыу, нәҫел-нәсәп, ҡәрҙәштәр; **гости́ть у родны́х** туғандарҙа ҡунаҡ булыу; **у него́ мно́го родны́х** уның ағай-энеһе күп **3.** (*о месте рождения*) тыуған, үҙ; **родно́й край** тыуған яҡ; **родно́й го́род** тыуған ҡала **4.** (*близкий сердцу*) ҡәҙерле, һөйөклө, туған **5.** (*в обращении*) ҡәҙерлем, туғаным, һөйөклөм ♦ **родно́й язы́к** туған тел

**РОДНЯ́** *ж* **1.** *собир.* туған-тыумаса, ағай-эне, нәҫел-нәсәп, ҡәрҙәш-ырыу; **мно́го родни́** туған-тыумасалары күп **2.** *разг.* туған, ҡәрҙәш, зат, нәҫел; **приходи́ться роднёй** ҡәрҙәш булыу (тура килеү)

**РОДОВИ́ТОСТЬ** *ж* яҡшы нәҫелдән (заттан, ырыуҙан) булыу, аҫыл затлылыҡ, нәҫелдең (заттың, ырыуҙың) затлылығы; **родови́тость жениха́** кейәүҙең яҡшы нәҫелдән булыуы

**РОДОВИ́ТЫЙ,** -ая, -ое затлы нәҫелдән, аҫыл заттан, затлы, нәҫелле; **родови́тый челове́к** нәҫелле кеше

**РОДОВО́Й I,** -ая, -ое **1.** ырыу ...ы, төбә ...ы, ырыулыҡ ...ы; **родова́я тамга́** ырыу тамғаһы; **ро-**

**дово́й строй** ырыу ҡоролошо **2.** нәҫелдән килгән, мираҫҡа ҡалған, нәҫелдән нәҫелгә күсеп килгән; **родово́е име́ние** нәҫелдән нәҫелгә күсеп килгән имение **3.** ырыу ...ы, төр ...ы; **родовы́е и видовы́е поня́тия** ырыу һәм төр төшөнсәләре

**РОДОВО́Й II,** -ая, -ое бала табыу ...ы, бала тыуҙырыу ...ы, бәпесләү ...ы, бала тыуғандағы; **родовы́е схва́тки** бәпесләү тулғағы; **родово́й час** бәпесләү ваҡыты

**РОДОВСПОМОГА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бәпесләү ...ы, бала табыу ...ы, бала тыуҙырыу ...ы, бала табырға ярҙам итә торған; **родовспомога́тельные учрежде́ния** бала табырға ярҙам итә торған учреждениелар

**РОДОНАЧА́ЛЬНИК** *м* **1.** боронғо ата, ырыу (нәҫел, тоҡом) башлығы (башы) **2.** *перен.* (*основоположник*) нигеҙ һалыусы, башлап ебәреүсе, нигеҙләүсе

**РОДОНИ́Т** *м* родонит (*алһыу төҫтәге ҡаты минерал*)

**РОДОСЛО́ВИЕ** *с* **1.** ырыу (нәҫел, зат-ырыу, нәҫел-нәсәп) тарихы; **занима́ться свои́м родосло́вием** үҙеңдең нәҫел тарихың менән шөғөлләнеү **2.** шәжәрә, тайра; **кни́га родосло́вия** шәжәрә китабы

**РОДОСЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ырыу (зат-ырыу, нәҫел-нәҫәп, нәҫел) ...ы, шәжәрә ...ы; **родосло́вная кни́га** шәжәрә китабы; **родосло́вная табли́ца** нәҫел-нәсәп йәҙүәле **2.** *в знач. сущ.* **родосло́вная** *ж* шәжәрә, тайра; **соста́вить родосло́вную ро́да** ырыу шәжәрәһен төҙөү ♦ **родосло́вное де́рево** шәжәрә, тайра

**РО́ДСТВЕННИК** *м* и **РО́ДСТВЕННИЦА** *ж* туған, ҡәрҙәш; **да́льний ро́дственник** алыҫ туған

**РО́ДСТВЕННОСТЬ** *ж* туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек, яҡынлыҡ, оҡшашлыҡ; **ро́дственность языко́в** телдәрҙең ҡәрҙәшлеге; **ро́дственность иде́й** фекерҙәр яҡынлығы

**РО́ДСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡәрҙәшлек ...ы, туғанлыҡ ...ы, ағай-энелек ...ы; **ро́дственные отноше́ния** туғанлыҡ мөнәсәбәттәре; **ро́дственные свя́зи** ағай-энелек бәйләнештәре; **ро́дственные чу́вства** туғанлыҡ хистәре **2.** туғандаш, ҡәрҙәш, туған; **ро́дственные наро́ды** туғандаш халыҡтар; **ро́дственные языки́** ҡәрҙәш телдәр **3.** (*тёплый, сердечный*) туғандарса, туғандарға хас, йылы

**РОДСТВО́** *с* **1.** ҡәрҙәшлек, туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек (туғанлыҡ) ...ы; **кро́вное родство́** ҡан ҡәрҙәшлек; **чу́вство родства́** туғанлыҡ тойғоһо **2.** *собир., разг.* туған-тыумаса, зат-ырыу, ҡәрҙәштәр, ырыулыҡ; **многочи́сленное родство́** күп һанлы туған-тыумаса **3.** яҡынлыҡ, оҡшашлыҡ, туғанлыҡ; **родство́ взгля́дов** ҡараштарҙың оҡшашлығы

**РО́ДЫ** *мн.* бәпесләү; **запозда́лые ро́ды** һуңлап бәпесләү; **преждевре́менные ро́ды** ваҡытынан элек бәпесләү

**РОЕ́ВНЯ** и **РОЁВНЯ** *ж*; *пчел.* моҙға, ҡорт тубалы; **роёвня с пчёлами** ҡортло моҙға

**РОЕВО́Й,** -ая, -ое күс ...ы; **роево́е гуде́ние** күс геүләүе; **роевы́е пчёлы** күс ҡорттары

**РОЕ́НИЕ** *с см.* **рои́ться** 1

**РО́ЖА I** *ж* **1.** *прост.* (*лицо*) бит, йөҙ; **вы́тереть ро́жу** битте һөртөү **2.** *разг.* (*о человеке с некрасивым лицом*) ямаҡ кеше **3.** *прост., бран.* томшоҡ

**РО́ЖА II** *ж* сырхыуат, кила, сиртмә (*йоғошло ауырыу*); **заболе́ть ро́жей** сырхыуат менән ауырыу

**РОЖА́ТЬ** *несов.*; *разг. см.* **роди́ть** 1, 3

**РОЖДА́ЕМОСТЬ** *ж* тыуым, тыуыусылар һаны, тыуыу; **рост рожда́емости** тыуым артыу

**РОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **роди́ть** 1, 2

**РОЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **роди́ться** 1, 2; **2.** *страд. от* **рожда́ть**

**РОЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **рожда́ть**, **рожда́ться**; **рожде́ние ребёнка** бала тыуыу; **рожде́ние мы́сли** уй тыуыу **2.** (*момент появления на свет*) тыумыш; **глухо́й от рожде́ния** тыумыштан һаңғырау **3.** тыуған көн; **приглаша́ть на своё рожде́ние** үҙеңдең тыуған көнөңә саҡырыу

**РОЖДЕ́СТВЕНСКИЙ,** -ая, -ое Рождество ...ы, Раштыуа ...ы ♦ **рожде́ственские моро́зы** Раштыуа һыуыҡтары

**РОЖДЕСТВО́** *с* (*праздник*) Рождество, Раштыуа

**РОЖЕ́НИЦА** и **РОЖЕНИ́ЦА** *ж* бәпесләүсе (бала табыусы) ҡатын; **уха́живать за роже́ницей** бәпесләгән ҡатынды тәрбиәләү

**РОЖЕ́ЧНИК** *м* борғосо

**РО́ЖИСТЫЙ,** -ая, -ое сырхыуат ...ы, кила ...ы, сиртмә ...ы; **ро́жистое воспале́ние** сырхыуат шеше

**РОЖО́К** *м* **1.** мөгөҙсөк, бәләкәй мөгөҙ **2.** (*музыкальный инструмент*) борғо; **пасту́ший рожо́к** көтөүсе борғоһо **3.** саҡса (*мөгөҙ формаһындағы һауыт һ.б.*); **рожо́к для по́роха** саҡса **4.** (*для кормления*) мөгөҙ, һымраҡ **5.** (*для обуви*) ҡалаҡса **6.** (*плод растений*) (татлы) ҡуҙаҡ **7.** *мн.* **рожки́** (*макаронное изделие*) рожки ♦ **оста́лись ро́жки да но́жки** бик әҙ генә ҡалыу

**РОЖО́Н** *м*; *уст.* (*заострённый шест*) осло ҡаҙыҡ, ҡолға ♦ **лезть (пере́ть) на рожо́н** *прост.* хәүефле, ҡурҡыныс эш-хәлгә тотоноу (*алдыартты уйламай*)

**РОЖЬ** *ж* арыш; **ози́мая рожь** ужым арышы; **ярова́я рожь** яҙғы арыш; **жать рожь** арыш урыу

**РО́ЗА** *ж* роза; **кита́йская ро́за** ҡытай розаһы; **ча́йная ро́за** сәй розаһы; **подари́ть ро́зу** роза бүләк итеү ♦ **ро́за ветро́в** елдәр йүнәлеше (*билдәле бер урында, билдәле бер ваҡытта елдәрҙең иҫеү йүнәлешен күрһәткән һыҙма*)

**РОЗА́РИЙ** и **РОЗА́РИУМ** *м* роза баҡсаһы, роза түтәле, роза үрсеткес

**РО́ЗВАЛЬНИ** *только мн.* терһәкле (ләжәнкәле) сана

**РО́ЗГА** *ж* **1.** сыбыҡ, шыйыҡ сыбыҡ (*һуҡтырыу өсөн*) **2.** *мн.* **ро́зги**; *уст.* армай, һуҡтырыу;

**дать ро́зог** һуктырыу билдәләү; **бить ро́згами** армай һуғыу

**РОЗЕО́ЛА** *ж*; *мед.* розеола (*тәнгә сыҡҡан ҵенсәлекле ваҡ ҡыҙыл тап*)

**РОЗЕ́ТКА** *ж* розетка (**1.** *ҡайнатма, бал өсөн бәләкәй генә һауыт* **2.** *электр приборҙарын электр селтәренә тоташтырыусы йайлама* **3.** *электр лампаһы абажуры* **4.** *архит. япраҡ, сәскә һымаҡ итеп стенаға, түшәмгә һылап, йәбештереп эшләнгән биҙәк*)

**РОЗМАРИ́Н** *м* розмарин (**1.** *мәңге йәшел үҫемлек* **2.** *алма сорты*)

**РО́ЗНИЦА** *ж*; *спец.* бермәлләп (ваҡлап) һатылған тауар ♦ **в ро́зницу (покупа́ть, продава́ть и т.п.)** бермәлләп (ваҡлап) (алыу, һатыу һ.б.)

**РО́ЗНИЧНЫЙ,** -ая, -ое бермәлләп (ваҡлап) һатыу ...ы, бермәлләп (ваҡлап) һатыла торған; **ро́зничные това́ры** бермәлләп һатыла торған тауар; **ро́зничные це́ны** ваҡлап һатыу хаҡтары

**РОЗНЬ** *ж* **1.** (*вражда*) дошманлыҡ, ыҙғыш, талаш; **рознь в семье́** ғаиләләге ыҙғыш; **посе́ять рознь** дошманлыҡ сәсеү **2.** *кому-чему в знач. сказ.* айырылыу, айырма булыу; **оши́бка оши́бке рознь** хата менән хата араһында айырма бар

**РОЗОВЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*видне́ться*) алланып (алһыуланып, ҡыҙарып) күренеү (тороу) **2.** алһыуланыу, алланыу, ҡыҙарыу; **рябі́на розове́ет** миләш ҡыҙара; **щёки розове́ют** биттәре алһыулана

**РО́ЗОВЫЙ,** -ая, -ое роза ...ы; **ро́зовый буке́т** роза гөлләмәһе; **ро́зовый куст** роза ҡыуағы; **ро́зовое варе́нье** роза ҡайнатмаһы; **ро́зовое ма́сло** роза майы **2.** (*бледно-красный*) ал, алһыу; **ро́зовая ле́нточка** алһыу таҫма; **ро́зовое пла́тье** ал күлдәк **3.** *перен.* ал, тик яҡшы, яҡты; **ро́зовые наде́жды** яҡты өмөттәр ♦ **ви́деть всё в ро́зовом цве́те (све́те)**; **смотре́ть сквозь ро́зовые очки́** бөтә нәмәне лә ал да гөл тип күреү

**РОЗОЦВЕ́ТНЫЕ** *мн.*; *бот.* розалар семьяһы

**РО́ЗЫГРЫШ** *м* **1.** *см.* **разыгра́ть** 2, 3, 5; **ро́зыгрыш вещево́й лотере́и** әйберләтә лотерея уйнатыу; **ро́зыгрыш за́йма** займ уйнау; **ро́зыгрыш пе́рвенства** беренселек ярышы **2.** (*ничейный результат игры*) бер яҡтың да еңмәүе, отошһоҙ һөҙөмтә

**РО́ЗЫСК** *м* **1.** *см.* **разыска́ть – разы́скивать**; **ро́зыск това́рища** иптәш эҙләү **2.** *юр.* эҙләү, розыск; **объяви́ть ро́зыск** эҙләү иғлан итеү ♦ **уголо́вный ро́зыск** енәйәтте тикшереү бүлеге (*енәйәттәрҙе асыу, енәйәтселәрҙе тотоу эше буйынса милиция бүлеге*)

**РОЗЫСКНО́Й,** -ая, -ое эҙләү ...ы, эҙәрлекләү ...ы; **розыскно́е де́ло** эҙләү эше

**РОИ́СТЫЙ,** -ая, -ое күсле, күп күс айырған

**РОИ́ТЬ** *несов. кого*; *пчел.* күс туплау (йыйыу), бер күскә туплау (*бал ҡорттарын*)

**РОИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *прям.*; *перен.* күс (ҡорт) айырыу **2.** (*летать роем*) күс булып (көтөүе менән) осоу **3.** *перен.* мыжғыу, ҡайнау, ҡайнашыу; **в голове́ роя́тся мы́сли** башта фекерҙәр ҡайнаша

**РОЙ** *м* **1.** (*семья пчёл*) күс; **рой ди́ких пчёл** ҡырағай ҡорттар күсе **2.** төркөм, өйөр, көтөү; **рой ба́бочек** күбәләктәр өйөрө **3.** *кого-чего*; *перен.* төркөм, көтөү, тупланма; **рой краса́виц** матурҙар төркөмө

**РОК** *м*; *высок.* яҙмыш, тәҡдир; **злой рок** әсе яҙмыш; **по во́ле ро́ка** тәҡдир ҡушыуы буйынса

**РОКИРОВА́ТЬ** *сов., несов. см.* **рокирова́ться**

**РОКИРОВА́ТЬСЯ** *сов., несов.*; *шахм.* рокировка яһау

**РОКИРО́ВКА** *ж*; *шахм.* рокировка (*шахмат уйынында: бер генә тапҡыр бер үк ваҡытта королде бер шаҡмаҡ аша ладья яғына, ә ладьяны король аша уның яғына ҡуйыу*)

**РОКОВО́Й,** -ая, -ое **1.** бәхетһеҙ, ҡайғылы, ғазаплы; **рокова́я весть** ҡайғылы хәбәр; **рокова́я любо́вь** бәхетһеҙ мөхәббәт **2.** (*решающий*) хәл иткес; **рокова́й вопро́с** хәл иткес мәсьәлә; **роково́й шаг** хәл иткес аҙым **3.** (*предопределённый, гибельный*) ҡотолғоһоҙ, хәтәр, һәләкәтле, ҡурҡыныс; **рокова́я боле́знь** ҡотолғоһоҙ ауырыу

**РОКОКО́** *с нескл.* рококо (*XVIII б. Францияла барлыҡҡа килгән архитектура һәм декорация стиле*)

**РО́КОТ** *м* **1.** шаулау, геүләү, гөрөлдәү, гөрһөлдәү; **ро́кот мо́ря** диңгеҙ шаулауы; **ро́кот ору́дия** туп гөрһөлдәүе **2.** (*переливчатое звучание*) аһәң, моңло тауыш; **ро́кот струн** ҡылдар аһәңе

**РОКОТА́ТЬ** *несов.* шаулау, геүләү, күкрәү, гөрһөлдәү; **гром роко́чет** күк күкрәй

**РОЛ** *м*; *спец.* **1.** әйләнеүсе цилиндр, яҫма **2.** төргәк (*цилиндр формаһындағы*); **рол бума́ги** ҡағыҙ төргәге **3.** ҡағыҙ (*ҡатырға эшләү машинаһы*)

**РО́ЛИК** *м* **1.** ролик, тәгәрәгес, сығыр, бәләкәй тәгәрмәс; **крова́ть на ро́ликах** бәләкәй тәгәрмәсле карауат **2.** *эл.* ролик, кәтүк, сүре (*электр сымын беркетеп торған фарфор изолятор*) **3.** *мн.* **ро́лики** ролик (*тәгәрмәсле тимер табан*); **ката́ться на ро́ликах** роликта йөрөү

**РО́ЛИКОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ролик ...ы **2.** роликлы, тәгәрмәсле, ролигы (тәгәрмәсе) булған; **ро́ликовые коньки́** роликлы коньки

**РОЛЬ I** *ж* **1.** (*образ*) роль; **игра́ть роль** роль уйнау; **войти́ в роль** ролгә инеү **2.** роль, (һөйләгән) һүҙ; **вы́учить роль** һүҙҙе ятлау; **тетра́дь с роля́ми** ролдәр дәфтәре **3.** *кого* роль, вазифа, сифат; **выполня́ть роль перево́дчика** тәржемәсе вазифаһын үтәү **4.** (*мера влияния, значения в чём-л.*) роль, урын, әһәмиәт; **роль ли́чности в исто́рии** тарихта шәхестең тотҡан урыны ♦ **в ро́ли** *кого* вазифаһында, сифатында; **вы́держать роль** *см.* **вы́держать**; **игра́ть роль** (*иметь значение*) роль уйнау, урын тотоу, әһәмиәткә эйә булыу; **игра́ть роль** *кого* уйнау, кеше булып ҡыланыу; **войти́ в роль** оҫтарып китеү, шымарыу

**РОЛЬ II** *ж*; *спец. см.* **рол** 2

**РОЛЬГА́НГ** *м*; *тех.* рольганг (*роликлы конвейер, роликлы транспортёр*)

**РОМ** *м* ром (*спиртлы эсемлек*)

**РОМА́Н** *м* **1.** роман; **истори́ческий рома́н** тарихи роман; **фантасти́ческий рома́н** фантастик роман; **чита́ть рома́н** роман уҡыу **2.** *разг.* роман, мөхәббәт бәйләнеше; **ме́жду на́ми нет рома́на** беҙҙең арала роман юҡ

**РОМАНИЗА́ЦИЯ** *ж* романлашыу, романлаштырыу

**РОМАНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* романлаштырыу (*Боронғо Рим мәҙәниәтен һәм телен үҙләштерергә, ҡабул итергә мәжбүр итеү*)

**РОМАНИЗИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* романлашыу (*Боронғо Рим мәҙәниәтен һәм телен үҙләштереү*) **2.** *несов. страд. от* **романизи́ровать**

**РОМАНИ́ЗМ** *м* романизм (*роман телдәренән үҙләштерелгән һүҙ йәки әйтем*)

**РОМАНИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. см.* **романизи́ровать**

**РОМАНИЗОВА́ТЬСЯ 1.** *сов., несов. см.* **романизи́роваться 2.** *несов. страд. от* **романизова́ть**

**РОМАНИ́СТ I** *м* и **РОМАНИ́СТКА I** *ж* романсы (*роман яҙыусы*)

**РОМАНИ́СТ II** *м* и **РОМАНИ́СТКА II** *ж* романист (**1.** *роман телдәре һәм әҙәбиәте белгесе* **2.** *юр. Боронғо Рим хоҡуғы буйынса белгес, юрист*)

**РОМАНИ́СТИКА** *ж* романистика (*роман телдәрен һәм мәҙәниәтен өйрәнә торған фәндәр; роман филологияһы*)

**РОМА́НС** *м* романс (**1.** *фортепьяноға йәки башҡа музыка ҡоралына ҡушылып йырлар өсөн яҙылған ҡатмарлыраҡ йөкмәткеле лирик йыр* **2.** *гәҙәттә, мөхәббәткә арнап яҙылған йырға оҡшаш шиғыр*); **рома́нсы Гли́нки** Глинканың романстары; **петь рома́нсы** романстар йырлау; **написа́ть рома́нс** романс яҙыу

**РОМА́НСКИЙ,** -ая, -ое роман ...ы; **рома́нская культу́ра** роман мәҙәниәте ♦ **рома́нские языки́** роман телдәре

**РОМАНТИ́ЗМ** *м* романтизм (**1.** *XVIII б. аҙағында — XIX б. тәүге яртыһында классицизм ҡанундары менән көрәшкән, милли һәм индивидуаль үҙенсәлектәрҙе сағылдырырға тырышҡан, идеаль геройҙарҙы, тойғоларҙы һүрәтләгән әҙәбиәт һәм сәнғәт йүнәлеше* **2.** *оптимизм менән һуғарылған һәм көслө образдар аша кешенең оло бурысын күрһәтергә ынтылған әҙәбиәт һәм сәнғәт ысулы* **3.** *тормошто идеализациялау, ысынбарлыҡтан айырылыу менән билдәләнгән уй-тойғо; хыял*); **романти́зм Жуко́вского** Жуковский романтизмы; **скло́нность к романти́зму** романтизмға әүәҫлек

**РОМА́НТИК** *м* **1.** романтик; **францу́зские рома́нтики** француз романтиктары **2.** хыялға бирелеүсән кеше; **быть рома́нтиком** хыялға бирелеүсән кеше булыу

**РОМА́НТИКА** *ж* **1.** *см.* **романти́зм** 2, 3; **2.** романтика, хыял; **рома́нтика борьбы́ за свобо́ду** ирек өсөн көрәш хыялы; **рома́нтика тво́рческих иска́ний** ижади эҙләнеүҙәр романтикаһы

**РОМАНТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** романтик, романтизм ...ы; **романти́ческая поэ́зия** романтик поэзия; **романти́ческое произведе́ние** романтизм әҫәре **2.** романтик, хыялый; **романти́ческая любо́вь** хыялый мөхәббәт

**РОМАНТИ́ЧНОСТЬ** *ж* романтизм менән һуғарылған булыу, хыялдар менән мауығыу

**РОМАНТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **романти́ческий** 2

**РОМА́ШКА** *ж* аҡ сәскә, ромашка; **рома́шка паху́чая** еҫле ромашка

**РОМА́ШКОВЫЙ,** -ая, -ое аҡ сәскә ...ы, ромашка ...ы; **рома́шковая насто́йка** аҡ сәскә төнәтмәһе

**РОМБ** *м* ромб (**1.** *мат. мөйөштәре тура булмаған тигеҙ яҡлы параллелограмм* **2.** *1943 й. тиклем Совет Армияһының юғары командирҙар дәрәжәһен күрһәткән шул формалағы билдә*); **нацепи́ть на петли́цы ро́мбы** петлицаларға ромбтар тағыу

**РОМБИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** ромб ...ы; **ромби́ческий у́гол** ромб мөйөшө **2.** ромб формаһындағы; **ромби́ческая анте́нна** ромб формаһындағы антенна

**РОМБОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое ромб һымаҡ, ромб кеүек

**РО́МБОВЫЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **ромби́ческий**

**РО́МОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ром ...ы; **ро́мовый за́пах** ром еҫе **2.** ромлы, ром ҡушып (өҫтәп) эшләнгән ♦ **ро́мовая ба́ба** ромлы күмәс

**РОМШТЕ́КС** *м*; *кул.* ромштекс (*телгеләп ҡыҙҙырылған һум ит*)

**РО́НДО** *с нескл.*; *муз.* рондо (*төп темаһы күп тапҡыр ҡабатлана торған музыкаль әҫәр*)

**РОНДО́ I** *с нескл.*; *лит.* рондо (*айырым юлдары билдәле бер тәртиптә ҡабатланып килгән шиғыр*)

**РОНДО́ II** *с нескл.* рондо (**1.** *үҙенә бер төрлө түңәрәк шрифт* **2.** *тупаҡ башлы ҡаурый*)

**РОНЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* төшөрөү, төшөрөп ебәреү; **роня́ть ве́щи из рук** әйберҙәрҙе ҡулдан төшөрөп ебәреү **2.** *что* (*терять*) ҡойоу; **дере́вья роня́ют листву́** ағастар япраҡ ҡоя **3.** *что* түбән төшөрөү, әйеү, һалыу; **роня́ть го́лову** башты әйеү **4.** *что*; *перен.* (һүҙ) ташлау, иҫ китмәй генә әйтеү; **роня́ть остро́ты** үткер һүҙ ташлау **5.** *кого-что*; *перен.* төшөрөү, түбәнһетеү, кәмһетеү; **роня́ть своё досто́инство** үҙ дәрәжәңде төшөрөү ♦ **роня́ть слёзы** илау

**РОПА́К** *м* ропаҡ (*диңгеҙҙә ҡабырғаһы менән текә торған айырым боҙ*)

**РО́ПОТ** *м* **1.** (*выражаемое негромко недовольство*) һуҡраныу, зар, зарланыу, ризаһыҙлыҡ; **глухо́й ро́пот** эстән генә һуҡраныу; **возбуди́ть ро́пот** ризаһыҙлыҡ тыуҙырыу **2.** (*шум*) шау, шаулау, геүләү; **ро́пот ручья́** гөрләүектәр шауы; **ро́пот со́сен** ҡарағайҙар шаулауы

**РОПТА́ТЬ** *несов.* **1.** зарланыу, һуҡраныу, ризаһыҙлыҡ белдереү; **ропта́ть на непоря́дки** тәртипһеҙлектәргә һуҡраныу **2.** шаулау, геүләү; **во́лны ро́пщут** тулҡындар шаулай

**РОСА́** *ж* ысыҡ; **у́тренняя роса́** иртәнге ысыҡ; **роса́ блести́т на траве́** үләндә ысыҡ ялтырай ♦ **медвя́ная роса́** *см.* **медвя́ный**

**РОСИ́НКА** *ж* ысыҡ тамсыһы (бөртөгө) ♦ **ма́ковой роси́нки в рот не брать**; **ма́ковой роси́нки во рту не́ было** *см.* **ма́ковый**

**РОСИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ысыҡлы, ысыҡ төшкән; **роси́стая трава́** ысыҡлы үлән; **роси́стое у́тро** ысыҡлы иртә

**РОСИ́ТЬСЯ** *несов.* ысыҡланыу; **по утра́м трава́ роси́тся** иртәнсәк үлән ысыҡлана

**РОСКО́ШЕСТВО** *с* **1.** затлы (зиннәтле) булыу, нәзәкәтлелек; **роско́шество в пи́ще** ризыҡтың нәзәкәтлелеге **2.** (*роскошь*) үтә бай (мул)

**РОСКО́ШЕСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** үтә бай (мул) йәшәү, зиннәттә йәшәү **2.** *разг.* артыҡ ҡыланыу, мул тотоноу

**РОСКО́ШНИЧАТЬ** *несов.*; *разг. см.* **роско́шествовать**

**РОСКО́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бай, зиннәтле, затлы, аҫыл; **роско́шное изда́ние** бай баҫма; **роско́шный наря́д** затлы кейем **2.** (*расточительный*) мул, бай; **роско́шная жизнь** бай тормош **3.** (*очень красивый*) иҫ киткес, гүзәл, бик матур; **роско́шный цвето́к** бик матур сәскә **4.** (*изобильный, пышно растущий*) ҡабарып (күпереп) торған (үҫкән); **роско́шные во́лосы** ҡабарып торған сәс; **роско́шные тра́вы** күпереп үҫкән үлән

**РО́СКОШЬ** *ж* **1.** (*великолепие чего-л.*) матурлыҡ, гүзәллек, зиннәтлелек; **ро́скошь обстано́вки** йыһаздың зиннәтлелеге **2.** (*излишество в жизненных удобствах*) муллыҡ, байлыҡ, зиннәт; **жить в ро́скоши** зиннәттә йәшәү **3.** (*изобилие, пышность*) иҫ киткес гүзәллек (матурлыҡ); **ро́скошь ю́жной приро́ды** көньяҡ тәбиғәтенең иҫ киткес гүзәллеге

**РО́СЛОСТЬ** *ж* оҙон буйлылыҡ, буйсанлыҡ, ҙур кәүҙәлелек

**РО́СЛЫЙ,** -ая, -ое оҙон буйлы, буйсан, ҙур кәүҙәле, бейек; **ро́слый па́рень** буйсан егет; **ро́слая ло́шадь** бейек ат

**РОСОМА́ХА** *ж* ҡоно; **мех росома́хи** ҡоно тиреһе

**РОСОМА́ШИЙ,** -ья, -ье ҡоно …ы

**РО́СПИСЬ** *ж* **1.** *см.* **расписа́ть** 3 — **распи́сывать**; **приступи́ть к ро́списи** биҙәү эшенә тотоноу **2.** (*настенная живопись*) рәсем, биҙәк (стеналағы); **дре́вняя ро́спись** боронғо биҙәк **3.** *уст.* (*письменный перечень чего-л.*) исемлек, теҙмә; **ро́спись имён** исемдәр теҙмәһе; **ро́спись госуда́рственных дохо́дов и расхо́дов** дәүләттең килемдәр һәм сығымдар исемлеге **4.** *разг.* (*подпись*) ҡултамға; **заве́рить ро́списью** ҡултамға ҡуйыу, ҡултамға менән раҫлау

**РОССИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Рәсәй …ы; **Росси́йская а́рмия** Рәсәй армияһы

**РОССИЯ́НИН** *м* и **РОССИЯ́НКА** *ж*; *высок.* Рәсәй кешеһе, рәсәйле

**РО́ССКАЗНИ** *только мн.*; *разг.* уйҙырма, имеш-мимеш; **не ве́рить ро́ссказням** уйҙырмаларға ышанмау

**РО́ССЫПНЫЙ,** -ая, -ое *геол.* сәселмәле, сәсмә, һибелмә, һибелгән; **ро́ссыпное зо́лото** сәсмә алтын; **ро́ссыпное месторожде́ние** һибелмә ятҡылыҡ

**РО́ССЫПЬ** *ж* **1.** *разг., спец. см.* **рассы́пать** 1, 2 — **рассыпа́ть**; **ро́ссыпь муки́ по мешка́м** ондо тоҡтарға һалыу **2.** *разг.* (*то, что рассыпано*) күпләп түгелгән (һибелгән, сәселгән, ҡойолған) нәмә **3.** *геол.* сәсмә, бөртөк; **золоты́е ро́ссыпи** алтын бөртөктәре; **ква́рцевые ро́ссыпи** кварц сәсмәләре **4.** *геол.* ишелмә (*тау тоҡомдары ишелмәләре*); **камени́стые ро́ссыпи** таш ишелмәләре

**РОСТ** *м* **1.** *см.* **расти́**; **рост воло́с** сәс үҫеү; **рост населе́ния** халыҡ артыу; **рост расте́ний** үҫемлектәрҙең буйға үҫеүе; **тво́рческий рост арти́ста** артистың ижади үҫеше **2.** буй, кәүҙә; **высо́кого ро́ста** оҙон буйлы; **мала́ ро́стом** кәүҙәгә бәләкәй ♦ **во весь рост**: 1) аяҡ үрә, турайып (*баҫыу*); 2) баҫҡан килеш; 3) бөтә асыҡлығы (бар булмышы) менән килеп ҡалҡыу (баҫыу); **на рост (шить, покупа́ть)** үҫеүен иҫәпкә алып (тегеү, һатып алыу), ҙурыраҡ итеп (тегеү, алыу); **по ро́сту** таман; **пойти́ (тро́нуться) в рост** шәп үҫә башлау (*үҫемлек тураһында*)

**РО́СТБИФ** *м*; *кул.* ростбиф (*киҫәкләп ҡыҙҙырылған һыйыр ите*)

**РОСТКО́ВЫЙ,** -ая, -ое үҫенте …ы, шытым …ы

**РОСТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** үҫеү …ы, үҫеш …ы; **ростова́я пора́** үҫеү ваҡыты; **ростовы́е проце́нты** үҫеш проценттары **2.** (*содействующий росту*) үҫтереү …ы, үҫтерә торған; **ростовы́е вещества́** үҫтерә торған матдәләр

**РОСТОВЩИ́К** *м* и **РОСТОВЩИ́ЦА** *ж* ростовщик, риба алыусы (*ҙур процент алыу шарты менән бурысҡа аҡса биреп торған кеше*)

**РОСТОВЩИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ростовщик(тар) …ы, риба …ы; **ростовщи́ческие проце́нты** ростовщик проценттары

**РОСТО́К** *м* **1.** үҫенте, шытым; **росто́к карто́феля** картуф шытымы **2.** *обычно мн.* **ростки́**; *перен.* башланғыс, үҫенте, шытым; **ростки́ но́вого** яңылыҡ башланғыстары

**РО́СЧЕРК** м **1.** хәреф ҡойроғо (кәкерсәге) **2.** ҡултамға ҡойроғо; **по́дпись с ро́счерком** ҡой-

роҡландырып ҡуйылған ҡултамға ♦ **одни́м ро́счерком пера́** уйлап тормай, бер һыҙыу менән (хәл итеү)

**РОСЯ́НКА** *ж* ысыҡ үләне (*бөжәктәр менән аҙыҡлана торған үлән*); **руся́нка англи́йская** инглиз ысыҡ үләне

**РОСЯНО́Й** и **РОСЯ́НЫЙ,** -ая, -ое ысыҡ ...ы; **росяна́я ка́пля** ысыҡ тамсыһы

**РОТ** *м* **1.** ауыҙ; **большо́й рот** ҙур ауыҙ; **ма́ленький рот** бәләкәй ауыҙ; **открыва́ть рот** ауыҙ асыу; **раскры́ть рот** ауыҙ асыу **2.** *перен.*, *прост.* тамаҡ, кеше; **в семье́ пять ртов** ғаиләлә биш кеше ♦ **зажа́ть (закры́ть, заткну́ть) рот** *кому*; *прост.* ауыҙын ябыу; **рази́нуть (раскры́ть) рот**: 1) һүҙ башлау, һөйләү, ауыҙ асыу; 2) ныҡ иғтибарһыҙ булыу, ауыҙ асыу; 3) аптырап ҡалыу, ауыҙ асыу; **набра́ть воды́ в рот** ауыҙға йөҙөк йәшереү, һыу уртлау, ләм-мим өндәшмәү; **смотре́ть (гляде́ть) в рот** *кому* ауыҙына ҡарап тороу; **в рот не возьмёшь** ауыҙға алғыһыҙ; **па́льца в рот не клади́** *кому* бик тилбер; өлөшөн ашатмаҫ, буш ҡалмаҫ; **разжева́ть и в рот положи́ть** *кому* ауыҙына сәйнәп ҡаптырыу; **хлопо́т (забо́т) по́лон рот** *у кого* бик күп (*эш, мәшәҡәт тураһында*)

**РО́ТА** *ж*; *воен.* рота; **команди́р ро́ты** рота командиры; **та́нковая ро́та** танк ротаһы

**РОТАПРИ́НТ** *м* ротапринт; **печа́тать на ротапри́нте** ротапринтта баҫыу

**РОТАПРИ́НТНЫЙ,** -ая, -ое ротапринт ...ы; **ротапри́нтный цех** ротапринт цехы

**РОТА́ТОР** *м* ротатор; **размножа́ть на рота́торе** ротаторҙа күбәйтеү

**РОТА́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое ротатор ...ы; **рота́торная бума́га** ротатор ҡағыҙы

**РОТАЦИ́ЗМ** *м*; *спец.* һаҡаулыҡ (*"р" өнөн дөрөҫ әйтмәү, "р"-һыҙ булыу*)

**РОТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* ротация ...ы, ротацион; **ротацио́нная маши́на** ротацион машина

**РОТА́ЦИЯ** *ж* **1.** *полигр.* ротация, баҫыу машинаһы **2.** *с.-х.* ротация (*сәсеү әйләнешенә ярашлы барлыҡ баҫыуҙарҙа ла иген сәселгән осор*)

**РО́ТИК** *м* бәләкәй (уймаҡ) ауыҙ

**РО́ТМИСТР** *м* ротмистр (*революцияға тиклем Рәсәй атлы ғәскәрендә капитанға тиң дәрәжә һәм шул дәрәжәләге офицер*)

**РО́ТНЫЙ,** -ая, -ое *воен.* **1.** рота ...ы; **ро́тное хозя́йство** рота хужалығы **2.** *в знач. сущ.* **ро́тный** *м* рота командиры

**РОТОВО́Й,** -ая, -ое ауыҙ ...ы; **ротова́я по́лость** ауыҙ ҡыуышлығы

**РОТОЗЕ́Й** *м*; *разг.* **1.** (*зевака*) аңшайған, аңыш (кеше) **2.** (*разиня*) иғтибарһыҙ, асыҡ ауыҙ

**РОТОЗЕ́ЙНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* аңшайыу, асыҡ ауыҙланыу

**РОТОЗЕ́ЙСТВО** *с*; *разг.* аңшайғанлыҡ, асыҡ ауыҙлыҡ

**РОТО́К** *м*; *разг.* бәләкәй (уймаҡ) ауыҙ ♦ **на чужо́й рото́к не наки́нешь плато́к** кеше ауыҙын ҡаплап булмай

**РОТО́НДА** *ж* ротонда (**1.** *архит. көмбәҙләп ябылған, колонналы түңәрәк бина* **2.** *иҫк. ҡатын-ҡыҙҙарҙың өҫ кейеме*); **ба́рхатная рото́нда** бәрхәт ротонда

**РО́ТОР** *м*; *тех.* ротор (*турбина, электр двигателе кеүек машинаның әйләнеп торған өлөшө*)

**РО́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* **1.** ротор ...ы; **ро́торный вал** ротор валы; **ро́торные лопа́тки** ротор күрәксәһе **2.** роторлы; **ро́торный дви́гатель** роторлы двигатель

**РО́ХЛЯ** *м* и *ж*; *разг.*, *пренебр.* бәшәлкәһеҙ, ебегән, бешмәгән, асыҡ ауыҙ (*кеше*); **показа́ться ро́хлей** асыҡ ауыҙ булып күренеү

**РО́ЩА** *ж* ҡулҡы, бәләкәй урман; (*берёзовая*) сауҡалыҡ, сауыллыҡ; **оси́новая ро́ща** уҫаҡ ҡулҡыһы

**РОЯЛИ́ЗМ** *м* роялизм (*король хакимлығын яҡлау*)

**РОЯЛИ́СТ** *м* роялист (*король хакимлығын яҡлаусы*)

**РОЯ́ЛЬ** *м* рояль; **игра́ть на роя́ле** роялдә уйнау

**РТУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое терегөмөш ...ы, терегөмөшлө; **рту́тная руда́** терегөмөш мәғдәне; **рту́тный термо́метр** терегөмөшлө термометр

**РТУТЬ** *ж* терегөмөш (*химик элемент, металл*) ♦ **грему́чая ртуть** *см.* **гремучий**

**РУБА́КА** *м*; *разг.* йөрәкле (ҡыйыу) кеше, батыр, оҫта һуғышсы (*һалҡын ҡорал менән*)

**РУБА́НОК** *м* йышҡы

**РУБАНУ́ТЬ** *сов. см.* **руба́ть**, **руби́ть** 1—5

**РУБА́ТЬ** *несов.*; *прост. см.* **руби́ть** 1—5

**РУБА́ХА** *ж см.* **руба́шка** 1; **си́тцевая руба́ха** ситса күлдәк

**РУБА́ШКА** *ж* **1.** күлдәк; **си́няя руба́шка** күк күлдәк; **ни́жняя руба́шка** эске күлдәк; **ночна́я руба́шка** йоҡо күлдәге **2.** кире (арт) яғы (*кәрттең*) **3.** *спец.* (*масть животного*) төҫ, тире төҫө **4.** *разг.* (*оболочка чего-л.*) яры, көп, ҡабыҡ, тыш ♦ **оста́вить в одно́й руба́шке** бөлдөрөү, бөлгөнлөккә төшөрөү; **оста́ться в одно́й руба́шке** бөлөү, бөлгөнлөккә төшөү; **родиться в соро́чке (руба́шке)** *см.* **роди́ться**

**РУБАШО́НКА** *ж*; *разг.*, *уменьш. от* **руба́шка**

**РУБЕ́Ж** *м* **1.** (*граница*) сик; **охраня́ть рубежи́** сиктәрҙе һаҡлау **2.** *воен.* һыҙыҡ, рубеж; **оборони́тельный рубе́ж** оборона һыҙығы **3.** *перен.* (*грань*) сик, ара, үр, рубеж; **завоева́ть но́вые рубежи́** яңы үрҙәр яулау; **на рубеже́ двух эпо́х** ике дәүер араһында ♦ **за рубежо́м** сит илдә

**РУБЕРО́ИД** *м* рубероид (*ҡатырғанан, махсус состав һеңдереп, түбә ябыу йәки изоляция өсөн эшләнгән материал*); **изоляцио́нный руберо́ид** изоляция рубероиды; **крыть кры́шу руберо́идом** ҡыйыҡты рубероид менән ябыу

**РУБЕРО́ИДНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **рубeróидовый**

**РУБЕРО́ИДОВЫЙ,** -ая, -ое рубероид ...ы; **рубeróидовый заво́д** рубероид заводы; **рубeróидовая изоля́ция** рубероид изоляцияһы

**РУБЕ́Ц** *м* **1.** (*углубление, складка*) йөй **2.** (*шрам*) бирсә, эҙ, йөй; **са́бельный рубе́ц** ҡылыс эҙе **3.** *анат.* оло ҡарын (*көйөшлө малда*)

**РУБИ́ДИЙ** *м* рубидий (*химик элемент, металл*)

**РУБИ́ЛЬНИК** *м* өҙгөс, рубильник

**РУБИ́Н** *м* ҡыҙыл яҡут, кыҙыл йәүһәр, рубин; **кольцо́ с руби́ном** ҡыҙыл яҡут менән йөҙөк

**РУБИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыҙыл яҡут, ҡыҙыл яҡут ...ы; **руби́новые се́рьги** ҡыҙыл яҡут һырға **2.** (*о цвете*) күрән ҡыҙыл, сейә ҡыҙыл, ҡыҙыл яҡут төҫөндәге; **руби́новое вино́** сейә ҡыҙыл шарап

**РУБИ́ТЬ** *несов. что* **1.** киҫеү, ҡырҡыу, сабыу, тумырыу; **руби́ть бревно́** бүрәнә тумырыу; **руби́ть дрова́** утын ҡырҡыу; **руби́ть лёд** боҙ сабыу **2.** (*измельчать*) турау, тапау, сапҡылау, тураҡлау; **руби́ть капу́сту** кәбеҫтә турау; **руби́ть мя́со** ит тапау **3.** *горн.* сабыу; **руби́ть у́голь** күмер сабыу **4.** *кого* сабыу, ҡыйыу, киҫеү; **руби́ть са́блей** ҡылыс менән сабыу; **руби́ть враго́в** дошмандарҙы ҡыйып ташлау **5.** *перен.* (тура) әйтеү, ярып һалыу; **руби́ть пра́вду** дөрөҫлөктө ярып һалыу **6.** (*строить из брёвен*) бурау; **руби́ть избу́** өй бурау **7.** (*отделять, отсекать*) йығыу, киҫеү, ҡырҡыу, киҫә (ҡырҡа) һуғыу, ҡыйыу

**РУБИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** киҫешеү, һуғышыу, ҡыйышыу, сапҡылашыу; **руби́ться с проти́вником** дошман менән ҡыйышыу **2.** *страд. от* **руби́ть**

**РУ́БИЩЕ** *с* алама кейем, алам-һалам

**РУ́БКА I** *ж см.* **руби́ть** 1—4, 6, **руби́ться**; **ру́бка дере́вьев** ағас ҡырҡыу; **ру́бка мя́са** ит сабыу; **ру́бка избы́** өй бурау

**РУ́БКА II** *ж* **1.** *мор.* рубка; **команди́рская ру́бка** командир рубкаһы; **шту́рманская ру́бка** штурман рубкаһы **2.** (махсус) йорт, ҡаралты

**РУБЛЁВКА** *ж*; *разг.* (бер) һумлыҡ, бер тәңкә (тәңкәлек); **бума́жная рублёвка** ҡағыҙ бер тәңкә

**РУБЛЁВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (бер) һумлыҡ; **рублёвый биле́т** бер һумлыҡ билет; **рублёвый обе́д** бер һумлыҡ төшкө аш **2.** һум ...ы; **рублёвая зо́на** һум зонаһы

**РУ́БЛЕНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ваҡланған, туралған, тапалған; **ру́бленое мя́со** туралған ит **2.** (*бревенчатый*) буралған, бүрәнәнән бурап эшләнгән; **ру́бленый дом** буралған өй

**РУБЛЬ** *м* һум, тәңкә; **оди́н рубль** бер һум; **сере́бряный рубль** көмөш тәңкә ♦ **дли́нный рубль** *см.* **дли́нный**; **гна́ться за дли́нным рублём** оҙон аҡса артынан ҡыуыу

**РУ́БРИКА** *ж* **1.** бүлек, сәхифә, һүҙ башы, рубрика; **но́вая ру́брика** яңы бүлек **2.** (*графа*) бүлек, бүлем, бүленеш; **разнести́ да́нные по ру́брикам** мәғлүмәттәрҙе бүленеш буйынса теркәү

**РУБРИКА́ЦИЯ** *ж* бүлектәргә бүлеү

**РУБЦЕВА́ТЬСЯ** *несов.* уңалыу, ит үреү, бөтәшеү

**РУ́БЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** йөйлө; **ру́бчатая рукоя́ть нага́на** нагандың йөйлө һабы **2.** һырлы; **ру́бчатая ткань** һырлы тауар **3.** йөйлө, яра эҙҙәре булған (ҡалған); **ру́бчатая ко́жа** яра эҙҙәре булған тире

**РУ́БЧИК** *м* **1.** *уменьш. от* **рубе́ц** 1, 2; **2.** һыр; **ткань в ру́бчик** һырлы туҡыма

**РУ́ГАНЬ** *ж* һүгенеү (әрләү, тиргәү, һүгеү) һүҙҙәре, иреш, иреш-талаш

**РУГА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һүгенеү ...ы, әрләү ...ы; **руга́тельные слова́** һүгенеү һүҙҙәре

**РУГА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **руга́тельный**

**РУГА́ТЕЛЬСТВО** *с* һүгеш, иреш, әрләш, талаш; **гру́бое руга́тельство** тупаҫ талаш

**РУГА́ТЬ** *несов. кого-что* һүгеү, әрләү, тиргәү; **руга́ть без причи́ны** сәбәпһеҙ һүгеү; **кре́пко руга́ть** бик ҡаты әрләү

**РУГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*браниться*) һүгенеү, тиргәнеү, һуҡраныу; **руга́ться це́лый день** көнө буйы һуҡраныу **2.** *с кем* и *без доп.* әрләшеү, тиргәшеү, ирешеү, талашыу; **руга́ться ме́жду собо́й** үҙ-ара талашыу

**РУДА́** *ж* мәғдән, руда; **желе́зная руда́** тимер мәғдәне

**РУДИМЕ́НТ** *м* **1.** *см.* **рудимента́рный о́рган** **2.** *перен.*, *книжн.* (*остаток, след исчезнувшего явления*) ҡалдыҡ, эҙ

**РУДИМЕНТА́РНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* рудиментар, ҡалдыҡ, етлекмәй ҡалған ♦ **рудимента́рный о́рган** *биол.* рудиментар ағза (*етлекмәй ҡалған ағзалар. мәҫ., ҡоймос һөйәге*)

**РУДНИ́К** *м* мәғдән усағы, рудник; **ме́дный рудни́к** баҡыр рудниги

**РУДНИКО́ВЫЙ,** -ая, -ое рудник ...ы; **руднико́вые рабо́чие** рудник эшселәре

**РУДНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое рудник ...ы, рудниктағы, рудникта була торған; **рудни́чный во́здух** рудниктағы һауа; **рудни́чная пыль** рудник саңы

**РУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое мәғдән ...ы, руда ...ы; **ру́дные месторожде́ния** мәғдән ятҡылыҡтары

**РУДОКО́П** *м*; *уст.* мәғдәнсе, мәғдән (руда) ҡаҙыусы, мәғдән (руда) сығарыусы

**РУДОКО́ПНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* мәғдән (руда) сығарыу ...ы; **рудоко́пная ша́хта** мәғдән сығарыу шахтаһы

**РУДОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое мәғдәнле, мәғдәне булған; **рудоно́сный пласт** мәғдәнле ҡатлам

**РУДОПОДЪЁМНЫЙ,** -ая, -ое мәғдән (руда) сығарыу (күтәреү) ...ы, мәғдән (руда) сығарыусы (күтәреүсе), мәғдән (руда) сығара (күтәрә) торған; **рудоподъёмная маши́на** мәғдән сығарыусы машина

**РУДОПРОМЫ́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое мәғдән (руда) йыуа торған

**РУДОУПРАВЛЕ́НИЕ** *с* рудник идаралығы

**РУЖЕ́ЙНИК** *м* мылтыҡсы (*мылтыҡ яһау оҫтаһы*)

**РУЖЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое мылтыҡ …ы; **руже́йный вы́стрел** мылтыҡ атыу тауышы; **руже́йное ма́сло** мылтыҡ майы

**РУЖЬЁ** *с* мылтыҡ; **двуство́льное ружьё** ҡуш көбәкле мылтыҡ; **кремнёвое ружьё** саҡматаш мылтыҡ; **нарезно́е ружьё** һыҙма мылтыҡ; **ствол ружья́** мылтыҡ көбәге; **заряди́ть ружьё** мылтыҡ яһау ♦ **призва́ть под ружьё** хәрби хеҙмәткә саҡырыу; **быть под ружьём**: 1) хәрби әҙерлек хәлендә тороу; 2) армияла хеҙмәт итеү

**РУИ́НА** *ж* **1.** *обычно мн.* **руи́ны** емерек, емереклек, хараба; **преврати́ться в руи́ны** хараба хәленә килеү **2.** *перен., разг.* бик ҡарт кеше

**РУКА́** *ж* **1.** ҡул; **пра́вая рука́** уң ҡул; **ле́вая рука́** һул ҡул; **одна́ рука́** һыңар ҡул; **ты́льная сторона́ руки́** ҡул һырты; **кисть руки́** ҡул осо; **мозо́листые ру́ки** һөйәлле ҡулдар; **держа́ть за́ руку** ҡулдан тотоу; **вести́ по́д руку** *кого-л.* ҡултыҡлап алып барыу; **идти́ по́д руку** *с кем-л.* ҡултыҡлашып барыу **2.** *мн.* **ру́ки** (*рабочая сила*) ҡул, эш ҡулы, эшсе ҡулдар; **ма́ло свобо́дных рук** эшсе ҡулдар әҙ **3.** (*почерк*) яҙыу, ҡул; **неразбо́рчивая рука́** таный алмаҫлыҡ яҙыу; **э́то не моя́ рука́** был минең ҡулым түгел **4.** *какая* эйә, хужа, ҡул; **нужна́ твёрдая рука́** талапсан хужа кәрәк **5.** терәк, таяныс, ҡул, яҡлаусы; **у него́ в верха́х своя́ рука́** юғарыла уның таянысы бар ♦ **золоты́е ру́ки** *у кого* алтын ҡулдар, оҫта ҡуллы; **лёгкая рука́** *см.* **лёгкий**; **тяжёлая рука́** *см.* **тяжёлый**; **пра́вая рука́** уң ҡанаты (ҡулы) иң яҡшы ярҙамсы; **го́лыми рука́ми** ҡоро ҡул менән, ҡоралһыҙ-ниһеҙ; **в рука́х** ҡулында булыу; **на́ руку** *кому* уңайлы, файҙалы; **на рука́х** *у кого* ҡулда (янда) булыу; **не рука́** *кому* яраҡһыҙ, тура (тап) килмәү; **по рука́м!** хәл иттек!, килештек!; **рука́ми и нога́ми**; **с рука́ми и нога́ми**: 1) тотош, бөтөн көйгә, башы-тояғы менән; 2) ҡуш ҡуллап (риза булыу); **рука́ ру́ку мо́ет** ҡул ҡулды йыуа (*бер-береһенең гәйебен йәшереү хаҡында*); **рука́ о́б руку** ҡулға ҡул тотоношоп; **рука́ не дро́гнет** *у кого, чья* ҡулы ҡалтырамаҫ; **рука́ не поднима́ется (не подыма́ется)** *у кого*: 1) ҡул бармай (*ниҙер эшләргә*); 2) *на кого* ҡул күтәрелмәү; **ру́ки коротки́** *у кого* ҡулы ҡыҫҡа (*берәй эш ҡылырға мөмкинселеге, хоҡуғы юҡ*; *ҡулынан килмәй*); **ру́ки не дохо́дят** *до чего* ҡул теймәй (етмәй); **ру́ки опуска́ются** *у кого* ҡулы бармай; **ру́ки прочь** *от кого-чего* ҡул һалмағыҙ, теймәгеҙ; **ру́ки че́шутся** *у кого*: 1) һуғышҡыһы килә, ҡулы ҡысый; 2) ниҙер эшләгеһе килә, ҡулы ҡысый; **руко́й пода́ть** *до чего* яҡында ғына, янда; **мара́ть (па́чкать) ру́ки** *об кого-что* теләмәгән эшкә ҡыҫылыу, ҡул(ды) бысратыу; **нагре́ть ру́ки** *на чём* намыҫһыҙ рәүештә байлыҡ туплау, ҡулға байлыҡ, мал төшөрөү; **пода́ть ру́ку по́мощи** *кому* ярҙам ҡулы һуҙыу; **поднима́ть (подня́ть) ру́ку** *на кого-что* ҡул күтәреү; **брать (взять) в ру́ки** *кого* ҡулға алыу; **брать (взять) го́лыми рука́ми** *кого-что* ҡулға төшөрөү (*еңел генә эйә булып алыу*); **прибра́ть к рука́м**: 1) *кого кемде* ҡулға алыу; 2) *что нимәне* ҡулға төшөрөү; **приложи́ть ру́ку**: 1) ҡул ҡуйыу, имза һалыу; 2) ҡул тығыу (һалыу) (*насар эш-хәлгә*); **носи́ть на рука́х** *кого* өрмәгән ергә ултыртмау, ус төбөндә генә йөрөтөү; **отби́ться от рук** *см.* **отби́ться**; **из рук вон (пло́хо, плохо́й)** бик насар, хөрт, бер нәмәгә яраҡһыҙ; **из рук в ру́ки** ҡулдан-ҡулға; **с рук сбыть** ҡотолоу, арыныу; **с рук сойти́** яуапһыҙ ҡотолоп ҡалыу; **сложа́ ру́ки (сиде́ть, стоя́ть и т.п.)** *см.* **сложи́ть**; **умы́ть ру́ки** *см.* **умы́ть**; **чужи́ми рука́ми жар загреба́ть** *см.* **жар**

**РУКА́В** *м* **1.** ең; **рука́в пла́тья** күлдәк еңе; **рука́в шу́бы** тун еңе; **вшива́ть рука́в** ең ултыртыу **2.** тармаҡ; **рука́в реки́** йылға тармағы **3.** эсәк, еңсә; **пожа́рный рука́в** янғын һүндереү эсәге ♦ **спустя́ рукава́** илке-һалҡы (эшләү); **засучи́в рукава́ (рабо́тать)** ең һыҙғанып (эшләү)

**РУКАВИ́ЦЫ** *мн.* (*ед.* **рукави́ца** *ж*) бейәләй; **ко́жаные рукави́цы** күн бейәләй; **меховы́е рукави́цы** тире бейәләй ♦ **держа́ть в ежо́вых рукави́цах** *см.* **ежо́вый**

**РУКАВИ́ЧКИ** *мн.* (*ед.* **рукави́чка** *ж*); *уменьш. от* **рукави́цы**

**РУКА́ВНЫЙ,** -ая, -ое ең …ы; **рука́вные швы** ең йөйө

**РУКА́ВЧИК** *м*; *уменьш. от* **рука́в**

**РУКОВОДИ́ТЕЛЬ** *м* и **РУКОВОДИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* етәксе, башлыҡ; **кла́ссный руководи́тель** синыф етәксеһе; **руководи́тель отде́ла** бүлек башлығы; **руководи́тель драмкружка́** драма түңәрәге етәксеһе

**РУКОВОДИ́ТЬ** *несов. кем-чем* **1.** (*управлять*) идара итеү **2.** (*являться побудительной причиной*) йүнәлеш биреү, ҡарап тороу **3.** (*быть во главе чего-л.*) етәкселек итеү, етәкләү; **руководи́ть радиокружко́м** радиотүңәрәк менән етәкселек итеү; **руководи́ть отде́лом** бүлекте етәкләү

**РУКОВО́ДСТВО** *с* **1.** етәкселек; **коллекти́вное руково́дство** коллектив етәкселек **2.** (*пособие*) ҡулланма; **приня́ть в ка́честве руково́дства** ҡулланма итеп алыу **3.** *собир.* етәкселәр; **руково́дство Сою́за писа́телей** Яҙыусылар союзы етәкселәре

**РУКОВО́ДСТВОВАТЬ** *несов. см.* **руководи́ть**

**РУКОВО́ДСТВОВАТЬСЯ** *несов. чем* ҡулланыу, ҡулланып (таянып) эшләү (эш итеү), буйынса (-дан/-дән сығып) эш итеү; **руково́дствоваться пра́вилами** ҡағиҙәләргә таянып эшләү, ҡағиҙәләрҙән сығып эш итеү

**РУКОВОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **руководи́ть** **2.** *прил.* етәксе; **руководя́щие ка́дры** етәксе кадрҙар; **руководя́щие указа́ния** етәксе күрһәтмәләр

**РУКОДЕ́ЛИЕ** *с* **1.** ҡул эше; **занима́ться рукоде́лием** ҡул эше менән шөғөлләнеү **2.** (*изделие*) ҡулдан эшләнгән нәмә; **вы́ставка рукоде́лий** ҡулдан эшләнгән әйберҙәр күргәҙмәһе

**РУКОДЕ́ЛЬНИЦА** *ж* ҡул эшенә оҫта (*ҡатын-ҡыҙ*); **быть рукоде́льницей** ҡул эшенә оҫта булыу

**РУКОДЕ́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ҡул эше менән шөғөлләнеү, ҡул эше эшләү; **рукоде́льничать в свобо́дное вре́мя** буш ваҡытта ҡул эше менән шөғөлләнеү

**РУКОДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡул эше ...ы; **рукоде́льный кружо́к** ҡул эше түңәрәге **2.** ҡул менән (ҡулдан) -ған/-гән; **рукоде́льные кружева́** ҡулдан бәйләнгән селтәр

**РУКОКРЫ́ЛЫЕ** *мн.*; *зоол.* ярғанаттар

**РУКОМО́ЙНИК** *м* йыуынғыс, ҡулйыуғыс; **нали́ть во́ду в рукомо́йник** йыуынғысҡа һыу ҡойоу

**РУКОПА́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡул ...ы; **рукопа́шный бой** ҡул һуғышы **2.** *в знач. сущ.* **рукопа́шный** *м* и **рукопа́шная** *ж* ҡул һуғышы; **сойти́сь в рукопа́шной** ҡул һуғышында осрашыу

**РУКОПИ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡулъяҙма ...ы; **рукопи́сный отде́л библиоте́ки** китапхананың ҡулъяҙма бүлеге **2.** ҡулдан яҙылған, ҡулъяҙма; **рукопи́сный журна́л** ҡулъяҙма журнал; **рукопи́сные те́ксты** ҡулдан яҙылған текстар

**РУ́КОПИСЬ** *ж* ҡулъяҙма; **изуче́ние дре́вних ру́кописей** боронғо ҡулъяҙмаларҙы өйрәнеү; **на права́х ру́кописи** ҡулъяҙма хоҡуғында; **фонд ру́кописей** ҡулъяҙмалар фонды

**РУКОПЛЕСКА́НИЯ** *мн.* (*ед.* **рукоплеска́ние** *с*) алҡыштар, ҡул сабыу, сәпәкәйләү; **рукоплеска́ния зри́телей** тамашасыларҙың ҡул сабыуы; **раздали́сь рукоплеска́ния** алҡыштар яңғыраны

**РУКОПЛЕСКА́ТЬ** *несов.* алҡышлау, ҡул сабыу, сәпәкәйләү; **зал до́лго рукоплеска́л** зал оҙаҡ ҡул сапты; **рукоплеска́ть арти́стам** артистарҙы алҡышлау

**РУКОПОЖА́ТИЕ** *с* ҡул ҡыҫышыу (ҡыҫыу); **дру́жеское рукопожа́тие** дуҫтарса ҡул ҡыҫышыу

**РУКОПРИКЛА́ДСТВО** *с*; *разг.* ҡул күтәреү; **обвиня́ть в рукоприкла́дстве** ҡул күтәргән өсөн ғәйепләү

**РУКОЯ́ТКА** *ж* **1.** һап; **рукоя́тка молотка́** сүкеш һабы **2.** (*в машинах*, *приборах*) тотҡа, тотҡос

**РУКОЯ́ТЬ** *ж см.* **рукоя́тка**

**РУЛЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** руль ...ы; **рулево́е колесо́** руль тәгәрмәсе **2.** *в знач. сущ.* **рулево́й** *м* рулевой (*караблдә*); ҡойроҡсо, ҡойроҡ тотоусы (*кәмәлә*) ♦ **рулевы́е пе́рья** ҡойроҡ ҡауырһындары (*ҡоштарҙа*)

**РУЛЕ́Т** *м*; *кул.* **1.** рулет (*сусҡаның һөйәкһеҙ һум ите*) **2.** ҡатлама, төрмә, рулет; **карто́фельный руле́т** картуф рулеты; **руле́т с ма́ком** мәкле төрмә

**РУЛЕ́ТКА** *ж* рулетка (**1.** *үлсәү таҫмаһы* **2.** *отошло уйын ҡулайламаһы*); **ме́рить руле́ткой** рулетка менән үлсәү; **игра́ть в руле́тку** рулеткала уйнау

**РУЛИ́ТЬ** *несов.* **1.** рулдә ултырыу, рулде бороу **2.** *ав.* (*о лётчике*) ерҙән тәгәр(л)әтеп (алып) барыу; (*о самолёте*) ерҙән тәгәр(л)әп барыу

**РУЛО́Н** *м* төргәк, рулон; **руло́н бума́ги** ҡағыҙ төргәге

**РУЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое рулон, төргәк, төргәкле, рулонлы; **руло́нный толь** рулонлы толь

**РУЛЬ** *м* **1.** руль; (*у лодки, плота*) ҡойроҡ; **сиде́ть за рулём** руль артында ултырыу; **управля́ть рулём** ҡойроҡ тотоу **2.** *перен.* (етәксе) үҙәк; **руль госуда́рственного управле́ния** дәүләттең идара итеү үҙәге ♦ **без руля́ и без ветри́л** маҡсатһыҙ һәм билдәле бер йүнәлешһеҙ

**РУМБ** *м*; *мор.* румб (*компас түңәрәгенең утыҙ икенән бер өлөшө*)

**РУМЫ́НСКИЙ,** -ая, -ое румын ...ы, Румыния ...ы; **румы́нский наро́д** румын халҡы; **румы́нский язы́к** румын теле

**РУМЫ́НЫ** *мн.* румындар, румын халҡы // *ед.* **румы́н** *м* румын ир-аты; **румы́нка** *ж* румын ҡатын-ҡыҙы

**РУМЯ́НА** *мн.* инлек, һандал, ҡыҙыл; **кра́сить лицо́ румя́нами** биткә инлек һөртөү

**РУМЯ́НЕЦ** *м* алһыулыҡ, ҡыҙыллыҡ; **зали́ться румя́нцем** биткә ҡыҙыллыҡ йүгереү

**РУМЯ́НИТЬ** *несов. что* **1.** ҡыҙартыу, аллау, алландырыу, алһыулатыу; **моро́з румя́нит щёки** һыуыҡ бит остарын алһыулата **2.** инлек яғыу (һөртөү), ҡыҙыл һөртөү (буяу); **румя́нить лицо́** йөҙгә инлек яғыу

**РУМЯ́НИТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡыҙарыу, алһыуланыу, алланыу; **её лицо́ румя́нилось** уның йөҙө алһыуланды **2.** инлек яғыу (һөртөү), ҡыҙыл һөртөү (*биткә*) **3.** (*поджариваться*) ҡыҙарып бешеү, йөҙө килеү; **пиро́г на́чал румя́ниться** бәлештең йөҙө килә башланы

**РУМЯ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыҙыл, алһыу, алһыуланған; **румя́ное лицо́** алһыу йөҙ; **румя́ные я́блоки** ҡыҙыл алмалар **2.** ҡыҙарған, ҡыҙарып (йөҙө килеп) бешкән; **румя́ный пиро́г** ҡыҙарып бешкән бәлеш

**РУНДУ́К** *м* (ҙур) әрйә, лар; **кры́шка рундука́** әрйә ҡапҡасы

**РУНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое рун ...ы; **руни́ческие на́дписи** рун яҙмалары

**РУНО́** *с* йөн, һарыҡ йөнө; **то́нкое руно́** нәҙек йөн

**РУ́НЫ I** *мн.* (*ед.* **ру́на** *ж*) рун яҙыуы, рун яҙмаһы (*таштарҙа яҙылған боронғо яҙмалар*)

**РУ́НЫ II** *мн.* (*ед.* **ру́на** *ж*) рун, рун йыры (*карелдарҙа, финдарҙа боронғо халыҡ йырҙары*)

**РУ́ПИЯ** *ж* рупия (*Һиндостан, Пакистан һәм башҡа ҡайһы бер илдәрҙең аҡса берәмеге*)

**РУ́ПОР** *м* **1.** рупор, һөрәнләгес; **крича́ть в ру́пор** һөрәнләгескә ҡысҡырыу **2.** *перен.*, *книжн.* таратыусы; **газе́та — ру́пор обще́ственного мне́ния** гәзит — йәмәғәтселек фекерен таратыусы

**РУСА́К I** *м* урғуян, үр ҡуяны

**РУСА́К II** *м*; *разг.* (*русский человек*) урыҫ кешеһе; **коренно́й руса́к** ерле урыҫ кешеһе

**РУСА́ЛКА** *ж*; *фольк.* һыу ҡыҙы (инәһе)

**РУСА́ЛОЧИЙ,** -ья, -ье **1.** һыу ҡыҙы ...ы, һыу инәһе ...ы; **руса́лочьи во́лосы** һыу ҡыҙының сәсе **2.** һыу ҡыҙыныҡы һымаҡ (кеүек); **руса́лочий взгля́д** һыу ҡыҙыныҡы һымаҡ ҡараш

**РУСА́ЧИЙ,** -ья, -ье урғуян ...ы, үр ҡуяны ...ы; **руса́чий след** урғуян эҙе

**РУСЕ́ТЬ I** *несов.*; *разг.* (*становиться русским*) урыҫлашыу

**РУСЕ́ТЬ II** *несов.*; *разг.* (*становиться русым*) һарғайыу, төҫтә һары итеү

**РУСИ́ЗМ** *м*; *лингв.* урыҫ һүҙе, русизм

**РУСИ́СТ** *м* русист (*русистика белгесе*)

**РУСИ́СТИКА** *ж* русистика (*урыҫ телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеүсе фәндәр*)

**РУСИФИКА́ЦИЯ** *ж см.* **русифици́ровать, русифици́роваться**; **наси́льственная русифика́ция** көсләп урыҫлаштырыу

**РУСИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* урыҫлаштырыу

**РУСИФИЦИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* урыҫлашыу **2.** *только несов. страд. от* **русифици́ровать**

**РУ́СЛО** *с* **1.** йырҙа, үҙән, юлаҡ; **речно́е ру́сло** йылға үҙәне **2.** *чего, какое*; *перен.* йүнәлеш, юл; **ру́сло обще́ственной жи́зни** йәмғиәт тормошоноң йүнәлеше ♦ **войти́ в ру́сло** юлға һалыныу, йайланып китеү

**РУСОВОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое һары сәсле; **русоволо́сая де́вушка** һары сәсле ҡыҙ

**РУСОФИ́Л** *м* урыҫҡа табыныусы

**РУСОФИ́ЛЬСТВО** *с* урыҫҡа табыныу (санлыҡ)

**РУСОФО́Б** *м* урыҫҡа ҡаршы

**РУСОФО́БСТВО** *с* урыҫты күрә алмау

**РУ́ССКАЯ I** *ж см.* **ру́сские**

**РУ́ССКАЯ II** *ж* (*пляска и музыка к ней*) урыҫ халыҡ бейеүе

**РУ́ССКИЕ** *мн.* урыҫтар, урыҫ халҡы // *ед.* **ру́сский** *м* урыҫ ир-аты; **ру́сская** *ж* урыҫ ҡатын-ҡыҙы, мәрйә

**РУ́ССКИЙ I** *м см.* **ру́сские**

**РУ́ССКИЙ II,** -ая, -ое **1.** урыҫ ...ы; **ру́сская культу́ра** урыҫ мәҙәниәте; **ру́сская литерату́ра** урыҫ әҙәбиәте; **ру́сский язы́к** урыҫ теле **2.** Рәсәй ...ы, Русь ...ы; **ру́сская исто́рия** Рәсәй тарихы; **ру́сское о́бщество** Рәсәй йәмғиәте

**РУ́СЫЙ,** -ая, -ое **1.** һары; **ру́сые во́лосы** һары сәс **2.** һары сәсле; **ру́сый па́рень** һары сәсле егет

**РУТЕ́НИЙ** *м* рутений (*химик элемент, металл*)

**РУТИ́НА** *ж* иҫкелек, иҫкеселек, торғонлоҡ, ҡатып ҡалғанлыҡ; **боро́ться с рути́ной** иҫкелеккә ҡаршы көрәшеү

**РУТИНЁР** *м* иҫкелек яҡлы кеше

**РУТИНЁРСТВО** *с* иҫкеселек, иҫкелек

**РУТИ́ННЫЙ,** -ая, -ое иҫкереп бөткән, иҫкелеккә нигеҙләнгән

**РУ́ХЛЯДЬ** *ж собир.*; *разг.* иҫке-моҫҡо, ҡыйҡыпыр; **вы́бросить ру́хлядь** иҫке-моҫҡоно ташлау

**РУ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** емерелеп (ишелеп) төшөү, ауыу; **де́рево ру́хнуло** ағас ауҙы **2.** (*упасть всей тяжестью — о человеке*) ҡолау, йығылыу, ҡолап (йығылып) төшөү **3.** *перен.* емерелеү, өҙөлөү, юҡҡа сығыу; **наде́жды ру́хнули** өмөттәр өҙөлдө

**РУ́ХНУТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **ру́хнуть** 1, 2; **ра́неный ру́хнулся на зе́млю** яралы ергә ҡоланы

**РУЧА́ТЕЛЬСТВО** *с* ышаныс яҙыуы, ышандырма

**РУЧА́ТЬСЯ** *несов.* ышандырыу, (яуаплылыҡты) өҫкә алыу, ышаныс (яуап) биреү; **руча́ться за успе́х де́ла** эштең уңышлы сығырына ышандырыу; **руча́ться за исхо́д опера́ции** операция һөҙөмтәһенә яуап биреү

**РУЧЕЁК** *м*; *уменьш.-ласк. от* **руче́й** 1

**РУЧЕ́Й** *м* **1.** инеш, шишмә, гөрләүек, өйәр; **го́рный руче́й** тау гөрләүеге; **у ручья́** инеш янында **2.** *в знач. нареч.* **ручьём** шишмә (йылға) булып; **кровь лила́сь ручьём** ҡан йылға булып аҡты

**РУ́ЧКА** *ж* **1.** *уменьш.-ласк. от* **рука́** 1; **2.** тотҡа, һап; **дверна́я ру́чка** ишек тотҡаһы; **ру́чка ножа́** бысаҡ һабы **3.** (*подлокотник*) яндау; **ру́чка кре́сла** кресло яндауы **4.** ручка (*яҙыу өсөн*); **автомати́ческая ру́чка** автоматик ручка

**РУЧНО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡул(дар) ...ы; **ручно́е полоте́нце** ҡул таҫтамалы; **ручны́е часы́** ҡул сәғәте **2.** ҡулдан -ған/-гән, ҡул менән; **ручна́я рабо́та** ҡулдан эшләнгән эш; **ручна́я вы́шивка** ҡулдан сигелгән сигеү **3.** ҡулға өйрәтелгән (эйәләштерелгән), ҡулға өйрәнгән (эйәләшкән); **ручно́й медве́дь** ҡулға эйәләшкән айыу **4.** *разг.* (*послушный — о человеке*) күндәм, буйһоноусан; **ручно́й муж** күндәм ир

**РУЧО́НКА** *ж*; *разг., уменьш.-ласк. от* **рука́** 1

**РУЧЬЕВО́Й,** -ая, -ое шишмә ...ы, инеш ...ы; **ручьева́я вода́** шишмә һыуы

**РУ́ШИТЬ** *несов. что* емереү, ишеү, ҡыйратыу, ватыу, емереп (ишеп, ҡыйратып) төшөрөү; **ру́шить сте́ну** стенаны емереү

**РУ́ШИТЬСЯ** *несов.* **1.** емерелеү, ишелеү, ҡыйралыу, ҡыйрау; **дом ру́шится** өй емерелә **2.** *перен.* емерелеү, тарҡалыу, юҡҡа сығыу; **ру́шилось сча́стье** бәхете юҡҡа сыҡты **3.** *страд. от* **ру́шить**

**РЫ́БА** *ж* **1.** балыҡ; **вя́леная ры́ба** ҡаҡланған балыҡ; **кра́сная ры́ба** ҡыҙыл балыҡ; **копчёная ры́ба** ыҫланған балыҡ; **морска́я ры́ба** диңгеҙ балығы **2.** *перен., разг.* (*о человеке*) дәртһеҙ, һүлпән кеше **3.** *астр.* Балыҡ (*йондоҙлоҡ*) ♦ **би́ться как ры́ба об лёд** *см.* **би́ться**; **лови́ть ры́бу в му́тной воде́** *см.* **лови́ть**; **как ры́ба в воде́** һыуҙағы балыҡ кеүек; **ни ры́ба ни мя́со** төшөп ҡалған, эшкинмәгән

**РЫБА́К** *м* балыҡсы, балыҡ тотоусы

**РЫБА́ЛКА 1.** *ж*; *разг.* балыҡ тотоу; **идти́ на рыба́лку** балыҡ тоторға барыу **2.** *м* и *ж*; *прост.* балыҡсы, балыҡ тотоусы

**РЫБА́ЦКИЙ,** -ая, -ое балыҡсы ...ы, балыҡсылар ...ы, балыҡсылыҡ ...ы, балыҡ тотоу ...ы; **рыба́цкая ло́дка** балыҡсы кәмәһе; **рыба́цкая арте́ль** балыҡсылар артеле

**РЫБА́ЧЕСТВО** *с* балыҡсылыҡ; **занима́ться рыба́чеством** балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү

**РЫБА́ЧИЙ,** -ья, -ье балыҡсы ...ы, балыҡсылар ...ы, балыҡсылыҡ ...ы; **рыба́чья ло́дка** балыҡсы кәмәһе

**РЫБА́ЧИТЬ** *несов.* балыҡ тотоу; **рыба́чить зимо́й** ҡышын балыҡ тотоу

**РЫБА́ЧКА** *ж* **1.** балыҡсы, балыҡ тотоусы **2.** балыҡсы (балыҡ тотоусы) ҡатыны

**РЫБЕ́Ц** *м* йоҡа ҡорман (*балыҡ*)

**РЫБЁШКА** *ж*; *разг.* селбәрә

**РЫ́БИЙ,** -ья, -ье **1.** балыҡ ...ы; **ры́бья чешуя́** балыҡ тәңкәһе; **ры́бий хвост** балыҡ ҡойроғо; **ры́бий жир** балыҡ майы **2.** *перен.* (*бесстрастный*) туң йөрәкле, һалҡын **3.** *перен.* (*бесцветный — о глазах*) төҫһөҙ, мәғәнәһеҙ; **смотре́ть ры́бьими глаза́ми** төҫһөҙ күҙҙәр менән ҡарау ♦ **ры́бьи глаза́** балыҡ күҙ; **на ры́бьем меху́** бет ҡабы кеүек, әтәс тиреһенән тегелгән (*йоҡа, йылы тотмаған кейем тураһында*)

**РЫ́БИНА** *ж*; *разг.* ҙур (елле) балыҡ; **пойма́ть ры́бину** ҙур балыҡ тотоу

**РЫ́БКА** *ж*; *уменьш.-ласк. от* **ры́ба** 1

**РЫ́БНИК** *м* **1.** балыҡ үрсетеү белгесе, балыҡ менән шөғөлләнеүсе, балыҡ эшкәртеүсе **2.** (*пирог*) балыҡ менән бәлеш

**РЫ́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** балыҡ ...ы, балыҡсылыҡ ...ы; **ры́бная кость** балыҡ һөйәге; **ры́бный за́пах** балыҡ еҫе; **ры́бное хозя́йство** балыҡсылыҡ хужалығы **2.** балыҡ ...ы; **ры́бные котле́ты** балыҡ котлеты **3.** балыҡлы, балыҡҡа бай; **ры́бное о́зеро** балыҡлы күл

**РЫБОВО́Д** *м* балыҡсы, балыҡ үрсетеүсе

**РЫБОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое балыҡсылыҡ ...ы, балыҡ үрсетеү ...ы; **рыбово́дное хозя́йство** балыҡ үрсетеү хужалығы

**РЫБОВО́ДСТВО** *с* балыҡсылыҡ, балыҡ үрсетеү эше; **занима́ться рыбово́дством** балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү

**РЫБОЗАВО́Д** *м* балыҡ (эшкәртеү) заводы

**РЫБОКОМБИНА́Т** *м* балыҡ (эшкәртеү) комбинаты

**РЫБОКОПТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое балыҡ ыҫлау ...ы; **рыбокопти́льный заво́д** балыҡ ыҫлау заводы

**РЫБОЛО́В** *м* балыҡсы, балыҡ тотоусы

**РЫБОЛОВЕ́ЦКИЙ,** -ая, -ое балыҡ тотоу ...ы, балыҡсылыҡ ...ы (*балыҡ тотоу эше менән шөғөлләнеүсе*); **рыболове́цкая арте́ль** балыҡ тотоу артеле

**РЫБОЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое балыҡ тотоу ...ы, балыҡсылыҡ ...ы; **рыболо́вный сезо́н** балыҡ тотоу миҙгеле; **рыболо́вный про́мысел** балыҡсылыҡ кәсебе

**РЫБОЛО́ВСТВО** *с* балыҡсылыҡ, балыҡ тотоу эше; **занима́ться рыболо́вством** балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү

**РЫБОПРОМЫСЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое балыҡсылыҡ ...ы; **рыбопромысло́вая арте́ль** балыҡсылыҡ артеле

**РЫБОПРОМЫ́ШЛЕННИК** *м* балыҡ етештереү предприятиеһы хужаһы

**РЫБОПРОМЫ́ШЛЕННОСТЬ** *ж* балыҡ сәнәғәте

**РЫБОПРОМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое балыҡ сәнәғәте ...ы; **рыбопромы́шленный комбина́т** балыҡ сәнәғәте комбинаты

**РЫБОТОРГО́ВЕЦ** *м* балыҡ һатыусы

**РЫБОТОРГО́ВЛЯ** *ж* балыҡ һатыу, балыҡ сауҙаһы

**РЫБОХО́Д** *м* (*плотиналарҙа*) балыҡ үткәрелеү, балыҡ үткәүеле

**РЫБОХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое балыҡ үткәүеле ...ы; **рыбохо́дные ле́стницы** балыҡ үткәүеле баҫҡыстары

**РЫБОЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое балыҡ ашай торған, балыҡ ашаусы; **рыбоя́дные живо́тные** балыҡ ашаусы хайуандар

**РЫБХО́З** *м* (*рыбоводное хозяйство*) балыҡ үрсетеү хужалығы, балыҡсылыҡ хужалығы

**РЫВО́К** *м* **1.** ҡапыл (кинәт, киҫкен) тартыу, тартылыу, ынтылыш, ырғылыш; **сде́лать рыво́к** ынтылыш яһау **2.** *перен.* ырғылыш, ырғылыу, көсөргәнеш; **рабо́тать без рывко́в** көсөргәнешһеҙ эшләү **3.** *спорт.* ырғым (*ауырлыҡты күтәреү ысулы*)

**РЫГА́ТЬ** *несов.* кикереү; **рыга́ть за обе́дом** ашағанда кикереү

**РЫГНУ́ТЬ** *сов. см.* **рыга́ть**

**РЫДА́ТЬ** *несов.* үкереп (үкһеп) илау, үкһеү, иңрәү, иңрәнеү, һыҡтау

**РЫДВА́Н** *м* ризуан (*бесән, һалам ташый торған бейек ирәсәле арба*)

**РЫЖЕБОРО́ДЫЙ,** -ая, -ое ерән һаҡаллы

**РЫЖЕВОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое ерән сәсле; **рыжеволо́сая де́вочка** ерән сәсле ҡыҙ

**РЫЖЕ́ТЬ** *несов.* ерән төҫ алыу, ерәнләнеү; **во́лосы рыже́ют** сәс ерәнләнә

**РЫ́ЖИЙ,** -ая, -ее **1.** ерән; **ры́жая борода́** ерән һаҡал; **ры́жая ло́шадь** ерән ат **2.** *в знач. сущ.* **ры́жий** *м*; *разг.* ерән (*цирк клоуны*)

**РЫ́ЖИК** *м* **1.** (*травянистое растение*) шипкән; **ры́жик льно́вый** етен шипкәне; **ры́жик посевно́й** сәсеүлек шипкәне **2.** (*гриб*) һары бәшмәк

**РЫ́ЖИКОВЫЙ,** -ая, -ое шипкән ...ы; **ры́жиковое ма́сло** шипкән майы; **ры́жиковое по́ле** шипкән баҫыуы

**РЫК** *м* аҡырыу, үкереү, олоу; **льви́ный рык** арыҫлан үкереүе

**РЫКА́ТЬ и РЫ́КАТЬ** *несов.* үкереү, олоу, аҡырыу (*яман тауыш менән*); **лев рыка́ет** арыҫлан үкерә

**РЫ́ЛО** *с* **1.** морон, томшоҡ; **свино́е ры́ло** сусҡа мороно **2.** *груб.*, *прост.* (*лицо*) бит, йөҙ, ҡиәфәт

**РЫ́ЛЬЦЕ** *с* **1.** *уменьш.-ласк. от* **ры́ло** 1; **2.** *бот.* емешлек ауыҙы **3.** (*передняя часть ствола орудия и т.п.*) көбәк осо (ауыҙы) ♦ **ры́льце в пуху́** *у кого кемдең* ҡулы бысранған (*насар эштә ҡатнашлығы булған кеше тураһында*)

**РЫ́НОК** *м*; *в разн. знач.* баҙар; **купи́ть на ры́нке** баҙарҙа һатып алыу; **продава́ть на ры́нке** баҙарҙа һатыу; **вне́шний ры́нок** *эк.* тышҡы баҙар; **мирово́й ры́нок** *эк.* донъя баҙары

**РЫ́НОЧНЫЙ,** -ая, -ое баҙар ...ы; **ры́ночные отноше́ния** баҙар мөнәсәбәттәре; **ры́ночные це́ны** баҙар хаҡтары

**РЫ́ПАТЬСЯ** *несов.*; *прост.* -ға/-гә ынтылыу (ашҡыныу)

**РЫСА́К** *м* юртаҡ ат

**РЫСЁНОК** *м* һеләүһен балаһы

**РЫ́СИЙ,** -ья, -ье һеләүһен ...ы

**РЫСИ́СТЫЙ,** -ая, -ое юртаҡ; **рыси́стый конь** юртаҡ ат

**РЫСИ́ТЬ** *несов.* **1.** (*бежать рысью — о животных*) юртыу; **рыси́ть под го́рку** тау аҫтына табан юртыу **2.** (*ехать рысью*) юрттырыу, юрттырып барыу

**РЫ́СКАТЬ** *несов.* **1.** *прям.*, *перен.* ҡыҙырып (эҙләнеп, темеҫкенеп) йөрөү; **волк ры́щет** бүре эҙләнеп йөрөй; **ры́скать по го́роду** ҡала ҡыҙырып йөрөү **2.** *мор.* (курстан) тайпылыу (ситләшеү, тайшаныу, ситкә сығыу)

**РЫСЦА́** *ж*; *разг.* ваҡ ҡына (яй ғына) юртыу; **перейти́ с рысцы́ на шаг** яй ғына юртыуҙан атлауға күсеү

**РЫСЦО́Й** *нареч.*; *разг.* **1.** (*мелкой рысью*) юртып; **е́хать рысцо́й** юртып барыу **2.** (*бегом*) йүгерә-атлап; **напра́виться рысцо́й** йүгерә-атлап йүнәлеү

**РЫСЬ I** *ж* юртыу; **перейти́ на рысь** юртыуға күсеү

**РЫСЬ II** *ж* һеләүһен; **лови́ть рысь** һеләүһен тотоу

**РЫ́СЬЮ** *нареч.* **1.** юрттырып, юртаҡлап, юртып; **дви́гаться ры́сью** юрттырып барыу **2.** *разг.* йүгереп, шәп, йүгерә-атлап; **ходи́ть ры́сью** йүгереп йөрөү

**РЫ́ТВИНА** *ж* тәгәрмәс эҙе, юлдағы соҡорсаҡыр

**РЫТЬ** *несов. что* **1.** ҡаҙыу, соҡоу, өңөү; **рыть зе́млю** ер ҡаҙыу; **рыть око́п** окоп соҡоу **2.** *разг.* (*перебирать в поисках чего-л.*) соҡоноу, бутау ♦ **рыть я́му** *кому кемгәлер* соҡор (баҙ) ҡаҙыу (*этлек эшләү*)

**РЫТЬЁ** *с см.* **рыть** 1; **рытьё кана́вы** канау ҡаҙыу

**РЫ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡаҙыныу, соҡоноу; **ры́ться в песке́** ҡомда соҡоноу **2.** *в чём* аҡтарыныу, эҙләнеү, соҡоноу, ҡаҙыныу; **ры́ться в журна́лах** журналдарҙа аҡтарыныу; **ры́ться в карма́нах** кеҫәләрҙә эҙләнеү **3.** *страд. от* **рыть**

**РЫХЛЕ́НИЕ** *с см.* **рыхли́ть**; **рыхле́ние по́чвы** тупраҡты йомшартыу

**РЫХЛЕ́ТЬ** *несов.* **1.** көпшәкләнеү, йомшарыу, лапшыу, кәүшәкләнеү; **земля́ от обрабо́тки рыхле́ет** эшкәртеүҙән тупраҡ йомшара; **снег рыхле́ет** ҡар көпшәкләнә **2.** *разг.* (*о теле*) былҡыланыу (*тәнгә ҡарата*)

**РЫХЛИ́ТЕЛЬ** *м* йомшартҡыс

**РЫХЛИ́ТЬ** *несов. что* йомшартыу, кәүшәкләндереү, көпшәкләндереү; **рыхли́ть гря́дки** түтәлдәрҙе йомшартыу

**РЫ́ХЛОСТЬ** *ж* йомшаҡлыҡ, кәүшәклек, былҡылыҡ; **ры́хлость гру́нта** ерҙең йомшаҡлығы

**РЫ́ХЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** йомшаҡ, кәүшәк, көпшәк; **ры́хлый снег** көпшәк ҡар; **ры́хлая земля́** йомшаҡ ер **2.** *разг.* былҡы, йомшаҡ; **ры́хлое те́ло** былҡы тән **3.** *перен.* ихтыярһыҙ, йомшаҡ холоҡло; **ры́хлая нату́ра** йомшаҡ тәбиғәтле

**РЫ́ЦАРСКИЙ,** -ая, -ое **1.** рыцарь ...ы, рыцар(ҙар) ...ы; **ры́царская честь** рыцарь намыҫы; **ры́царский долг** рыцарь бурысы **2.** *перен.* намыҫлы, выжданлы, егеттәрсә, ҡаһармандарса; **ры́царский посту́пок** ҡаһармандарса ҡылыҡ

**РЫ́ЦАРСТВО** *с* **1.** *собир.* рыцарҙар **2.** рыцарлыҡ дәрәжәһе **3.** егетлек, ҡаһарманлыҡ

**РЫ́ЦАРЬ** *м* **1.** рыцарь (*Көнбайыш Европала хәрби һәм ер биләүселәр ҡатламы*) **2.** *высок.* батыр, ҡаһарман, егет кеше

**РЫЧА́Г** *м* **1.** һалмауыр, рычаг; **подня́ть рычаго́м** һалмауыр менән күтәреү **2.** рычаг; **рыча́г управле́ния** идара итеү рычагы; **рыча́г ско́рости** тиҙлек рычагы **3.** *перен.* ҡуҙғатҡыс, этәргес көс, күтәреүсе сара; **гра́мотность — рыча́г культу́ры** белем — мәҙәниәтте күтәреүсе сара

**РЫЧА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое рычаг ...ы; **рыча́жная систе́ма** рычаг системаһы

**РЫЧА́ТЬ** *несов.* ырылдау, үкереү, аҡырыу; **львы рыча́т** арыҫландар ырылдай; **медве́дь рычи́т** айыу үкерә; **рыча́ть на всех** бөтәнөһөнә ырылдау

**РЬЯ́НОСТЬ** *ж* ихласлыҡ, тырышлыҡ, хиреслек; **рья́ность к рабо́те** эшкә ихласлыҡ

**РЬЯ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** тырыш, ихлас, хирес; **рья́ный хозя́ин** тырыш хужа; **рья́ный к рабо́те** эшкә хирес **2.** *разг.* (*резвый — о лошади*) шәп, етеҙ; **рья́ные ко́ни** етеҙ аттар

**РЭ́КЕТ** *м* янап (ҡурҡытып, көсләп) алыу (*аҡса, мөлкәт һ.б.*)

**РЭКЕТИ́Р** и **РЭКЕТЁР** *м* янап (ҡурҡытып, көсләп) алыусы

**РЮКЗА́К** *м* биштәр, рюкзак; **уложи́ть в рюкза́к** биштәргә һалыу

**РЮ́МКА** *ж* рюмка

**РЮ́ХИ** *мн.* (*ед.* **рю́ха** *ж*) *см.* **городки́**; **игра́ть в рю́хи** бура һуғыу

**РЯБЕ́ТЬ** *несов.* (*покрываться рябью*) шаҙраланыу, шаҙраланып тороу

**РЯБИЗНА́** *ж* сыбарлыҡ, ала-ҡолалыҡ; **рябизна́ окра́ски** буяуҙың ала-ҡолалығы

**РЯБИ́НА I** *ж* **1.** миләш, мышар (*ағасы*); **посади́ть ряби́ну** миләш ултыртыу **2.** *собир.* миләш, мышар (*емеше*); **кра́сная ряби́на** ҡыҙыл миләш; **чёрная ряби́на** ҡара миләш

**РЯБИ́НА II** *ж* (*щербина на лице*) шаҙра; (*на теле*) тап; **лицо́ с ряби́нами** шаҙралы йөҙ; **ряби́ны на ше́е** муйындағы таптар

**РЯБИ́ННИК I** *м* миләшлек, мышар урманы

**РЯБИ́ННИК II** *м* мышар барҡылдағы (*ҡош*)

**РЯБИ́НОВКА** *ж* миләш (мышар) араҡыһы; **вы́пить ряби́новки** миләш араҡыһы эсеү

**РЯБИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** миләш ...ы, мышар ...ы; **ряби́новая кора́** миләш ҡайырыһы; **ряби́новая пастила́** миләш ҡағы **2.** (*цвета ягод рябины*) миләш төҫөндәге, аҡһыл ҡыҙыл **3.** *в знач. сущ.* **ряби́новая** *ж см.* **ряби́новка**

**РЯБИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* шаҙраландырыу, быжырлау, бөҙөрләү; **ветеро́к ряби́т во́ду** ел һыу өҫтөн бөҙөрләй **2.** (*мелькать перед глазами*) сыбарланыу ♦ **в глаза́х ряби́т** күҙ алды сыбарланыу

**РЯБО́Й,** -ая, -ое **1.** шаҙра, быжыр; **рябо́е лицо́** шаҙра йөҙ **2.** сыбар, ала, ала-ҡола, таплы; **ряба́я ку́рица** сыбар тауыҡ

**РЯ́БЧИК** *м* сел; **свист ря́бчика** сел һыҙғырыуы; **охо́титься на ря́бчика** селгә һунар итеү

**РЯБЬ** *ж* **1.** бөҙөр, шаҙра; **рябь на во́дной пове́рхности** һыу өҫтөндәге шаҙра **2.** (*рябая окраска*) ала төҫ, сыбар ♦ **рябь в глаза́х** күҙ алдындағы сыбар

**РЯ́ВКНУТЬ** *сов.* **1.** екереү, ырылдау, аҡырыу; **медве́дь ря́вкнул** айыу аҡырҙы **2.** *прост.* (*выкрикнуть что-л.*) ҡысҡырып ебәреү, аҡырыу

**РЯД** *м* **1.** рәт; **в пе́рвом ряду́** беренсе рәттә; **ряд домо́в** өйҙәр рәте **2.** (*шеренга*) саф, рәт; **стро́иться в ряд** сафҡа теҙелеү; **встава́ть в ряд** рәткә баҫыу **3.** (*большое количество чего-л.*) байтаҡ, күп кенә, бер нисә; **ряд вопро́сов** бер нисә һорау **4.** *кого-чего мн.* **ряды́** (*совокупность лиц, принадлежащих к какой-л. организации, группе, среде и т.п.*) саф; **служи́ть в ряда́х а́рмии** армия сафында хеҙмәт итеү; **быть в ряда́х передовико́в** алдынғылар сафында булыу ♦ **в пе́рвых ряда́х** алғы сафта; **из ря́да вон выходя́щий** ғәҙәти түгел, ғәҙәттән тыш

**РЯДОВО́Й,** -ая, -ое **1.** (*обычный*) ябай, ғәҙәти; **рядово́й сотру́дник** ябай хеҙмәткәр; **рядово́й слу́чай** ғәҙәти хәл **2.** (*не являющийся командным*) рядовой; **рядово́й боє́ц** рядовой һалдат **3.** *в знач. сущ.* **рядово́й** *м* рядовой; **разжа́ловать в рядовы́е** рядовойға төшөрөү **4.** *с.-х.* теҙмә, рәт-рәт; **рядова́я се́ялка** теҙмә сәскес

**РЯ́ДОМ** *нареч.* **1.** (*возле*) йәнәш, ҡатар; **стоя́ть ря́дом** йәнәш тороу; **шага́ть ря́дом** ҡатар атлау **2.** (*по соседству*) эргәләш, йәнәш; **жить ря́дом** йәнәш йәшәү; **оказа́ться ря́дом** эргәләш тура килеү ♦ **ря́дом** *с кем-чем*; *в знач. предлога* янында, эргәһендә; **сплошь и (да) ря́дом** *см.* **сплошь**

**РЯ́ЖЕНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* булып кейенгән; **ря́женый шуто́м** кәмитсе булып кейенгән

**РЯ́ПУШКА** *ж* күл сабағы (*балыҡ*)

**РЯ́СА** *ж* ряса (*православие руханиҙарының киң еңле оҙон кейеме*)

**РЯ́СКА** *ж* һыутәңкә, тәлмәрйен тәңкәһе (*ваҡ тәңкәгә оҡшаған һыу үҫемлеге*); **ря́ска тройча́тая** өс өлөшлө һыу тәңкә

**РЯСТ** *м* яҙ йондоҙо (*үлән*)

# С

**С** и **СО** *предлог* **1.** *с род. п.* (*при обозначении предмета, места, с поверхности которого или от которого удаляется, отделяется кто-что-л.*) -дан/-дән; **сорва́ть я́блоко с я́блони** алмағастан алма өҙөп алыу; **убра́ть посу́ду со стола́** өҫтәлдән һауыт-һабаны йыйып алыу; **уйти́ с собра́ния** йыйылыштан сығып китеү; **удали́ть с уро́ка** дәрестән сығарып ебәреү

**2.** (*при обозначении места, откуда направлено движение, действие*) -дан/-дән; **верну́ться с Кавка́за** Кавказдан ҡайтыу; **ве́тер со стороны́ мо́ря** диңгеҙҙән иҫкән ел; **напа́сть на врага́ с ты́ла** дошманға тылдан һөжүм итеү; **наблюда́ть за хо́дом бо́я с высоты́** һуғыш барышын ҡалҡыулыҡтан күҙәтеү

**3.** *с род. п.* (*при обозначении места, предмета, характеризующего какое-л. лицо или предмет по происхождению, пребыванию где-л. и т.п.*) ...ы, -дан/-дән килгән (алынған); **цветы́ с ю́га** көньяҡ сәскәләре; **карти́на с вы́ставки** күргәҙмәнән алынған картина; **телегра́мма с доро́ги** юлдан килгән телеграмма

**4.** *с род. п.* (*при указании на время, являющееся начальным моментом в развитии какого-л. действия, состояния*) -дан/-дән (алып, башлап, бирле); **с де́тства** бала саҡтан алып; **с пе́рвых же дней** беренсе көндәрҙән алып; **пригото́вить с ве́чера** кистән әҙерләп ҡуйыу; **с утра́ до́ но́чи** иртәнән кискә тиклем; **с весны́ до о́сени** яҙҙан алып көҙгә тиклем

**5.** *с род. п.* (*при обозначении лица, предмета, от которого берётся, получается, требуется что-л.*) -дан/-дән; **получи́ть де́ньги с зака́зчика** заказ биреүсенән аҡса алыу; **урожа́й с гекта́ра** (һәр) гектарҙан алынған уңыш

**6.** *с род. п.* (*при обозначении предмета, лица, служащего образцом для подражания, воспроизведения*) -дан/-дән, -дың/-дең; **брать приме́р с ма́тери** әсәйҙән үрнәк алыу; **перевести́ с башки́рского языка́** башҡортсанан тәржемә итеү; **ко́пия с докуме́нта** документтың күсермәһе

**7.** *с род. п.* (*с существительными "согласие", "разрешение", "позволение" при указании на основание для совершения действия*) менән, буйынса, нигеҙендә; **с разреше́ния роди́телей** ата-әсәнең рөхсәте менән; **с ва́шего согла́сия** һеҙҙең ризалығығыҙ буйынса; **с согла́сия а́втора** автор ризалығы буйынса

**8.** *с род. п.* (*при указании причины состояния, действия*) -дан/-дән; **сгора́ть со стыда́** ояттан ҡыҙарыу; **умере́ть с го́лоду** астан үлеү

**9.** *с род. п.* (*при обозначении предмета, орудия, с помощью которого совершается действие*) менән (башлап), -дан/-дән (башлап); **писа́ть с большо́й бу́квы** ҙур хәреф менән яҙыу; **торгова́ть с рук** ҡулдан һатыу; **влюби́ться с пе́рвого взгля́да** бер күреүҙән ғашиҡ булыу; **корми́ть ребёнка с ло́жечки** баланы ҡалаҡ менән ашатыу

**10.** *с вин. п.* (*при указании на приблизительную меру, примерное количество чего-л.*) самаһы, тиклем, саҡлы, -лап/-ләп, -дай/-дәй, -ға/-гә яҡын; **отдохну́ть с по́лчаса** ярты сәғәттәй ял итеү; **прожи́ть в дере́вне с ме́сяц** ауылда бер айға яҡын йәшәү; **он получи́л с деся́ток пи́сем** ул унлап хат алды; **с ме́сяц наза́д** бер ай самаһы элек; **отъе́хать с киломе́тр** бер километр самаһы китеү; **он слу́жит с ме́сяц** ул бер айға яҡын хеҙмәт итә; **де́вочка ро́стом с ма́му** әсәһендәй буйлы ҡыҙыҡай

**11.** *с твор. п.* (*при обозначении совместности, указывая на предмет или лицо, участвующее в чём-л. вместе с кем-чем-л.*) менән; **идти́ с ма́мой** әсәй менән барыу; **поговори́ть с друзья́ми** дуҫтар менән һөйләшеү

**12.** *с твор. п.* (*при указании на наличие чего-л. в чём-л.*) -лы/-ле, -ған/-гән; **плато́к с бахромо́й** суҡлы шәл; **дождь со сне́гом** ҡарлы ямғыр; **кни́га с иллюстра́циями** рәсемле китап; **челове́к с ружьём** мылтыҡлы кеше; **хлеб с ма́слом** май яғылған икмәк; **мешо́к с муко́й** он һалынған тоҡ; **воз со снопа́ми** көлтә тейәлгән йөк; **ведро́ с молоко́м** һөт һалынған күнәк

**13.** *с твор. п.* (*при обозначении характера, образа действия*) -ып/-еп; **есть с жа́дностью** ҡомһоҙланып ашау; **слу́шать с восхище́нием** һоҡланып тыңлау; **идти́ с пе́снями** йырлап барыу; **просну́ться с головно́й бо́лью** баш ауыртып уяныу

**14.** *с твор. п.* (*при обозначении предмета, лица, посредством или с помощью которого осуществляется действие*) менән, арҡыры, -лап/-ләп; **мыть с мы́лом** һабынлап йыуыу; **бро́ситься с кулака́ми** *на кого-л.* *кемгәлер* йоҙроҡ менән ташланыу; **посла́ть с курье́ром** курьер менән ебәреү

**15.** *с твор. п.* (*при указании на лицо или предмет, с которым что-л. происходит, который испытывает, претерпевает что-л.*) -ды/-де, менән, -ға/-гә; **у него́ пло́хо с се́рдцем** уның йөрәге ауырта; **с самолётом произошла́ ава́рия** самолёт менән авария булған

**16.** *с твор. п.* (*при обозначении цели действия*) менән; **яви́ться с докла́дом** доклад менән килеү; **обрати́ться с про́сьбой** үтенес менән мөрәжәғәт итеү; **сде́лать с наме́рением** маҡсат менән эшләү

**17.** *твор. п.* (*при обозначении лица или предмета, к которому устанавливается какое-л. отношение другого лица или предмета*) менән; **познако́мить с де́вушкой** ҡыҙ менән таныштырыу; **сравни́ть с оригина́лом** төп нөсхә менән сағыштырыу; **согласи́ться с вы́водами** һығымталар менән ризалашыу; **быть осторо́жным с огнём** ут менән һаҡ булыу ♦ **с ми́ру по ни́тке — го́лому руба́шка** ил төкөрһә — күл булыр; илдән еп йыйһаң, яланғасҡа күлдәк булыр

**С...** (**со...**, **съ...**) *приставка* **1.** *ҡылым яһағанда ҡулланылып, түбәндәгеләрҙе аңлата*: 1) *өҫтән аҫҡа табан төшөү, мәҫ.*, **скати́ться** тәгәрләп төшөү; **спры́гнуть** һикереп төшөү; **стечь** ағып төшөү; **све́ситься** һалынып төшөү; 2) *юҡ итеү, бөтөрөү, алып ташлау, мәҫ.*, **сбрить** ҡырып ташлау; **скоси́ть** сабып бөтөрөү; **сре́зать** ҡырҡып ташлау; 3) *бер урынға тупланыу, бергә йыйылыу, мәҫ.*, **сбежа́ться** йүгерешеп бер урынға килеү; **слета́ться** осоп килеп етеү; **сте́чься** ағып төшөү; 4) *берләштереү, нығытыу, ҡушыу, мәҫ.*, **связа́ть** бәйләү; **скле́ить** йәбештереү; 5) *үҙ-ара мөнәсәбәт, мәҫ.*, **сговори́ться** һүҙ ҡуйышыу, килешеү, һөйләшеп килешеү; **сторгова́ться** сауҙалашыу, килешеү; **срабо́таться** килешеп эшләп китеү; **сыгра́ться** килешеп уйнап китеү; 6) *сағыштырыу, тиңләштереү, мәҫ.*, **све́рить** сағыштырып тикшереү (ҡарау); **сравни́ть** сағыштырып ҡарау; **соотнести́** тиңләштереп ҡарау; 7) *нимәнеңдер күсермәһен булдырыу, мәҫ.*, **списа́ть** күсереп яҙыу (алыу), күсереү; **срисова́ть** күсереп һүрәт яһау (төшөрөү); 8) *бөтөрөү, сарыф итеү, мәҫ.*, **скорми́ть** ашатып бөтөрөү; **спои́ть** эсереп бөтөрөү; 9) *үтәлеү, тормошҡа ашыу, мәҫ.*, **спра́виться** хәлдән (ҡулдан) килеү, булдырыу, көс етеү; **соблюсти́** һаҡлау, үтәү (*законды, диетаны*); 10) *булмышын үҙгәртеү, мәҫ.*, **сгла́дить** шымартыу, тигеҙләү; **смягчи́ть** йомшартыу, йомшаҡ итеү; **су́зить** тарайтыу, тарыраҡ итеү, тарайта төшөү

**2.** *ҡайһы бер ҡылымдарҙың тамамланған төрөн яһай, мәҫ.*, **сде́лать** яһау, эшләү; **спеть** йырлау; **спляса́ть** бейеү; **сыгра́ть** уйнау, уйнап алыу **3.** *исемдән, сифаттан төп, урын, сәбәп рәүештәре яһай, мәҫ.*, **слегка́** еңелсә; **спра́ва** уңдан, уң яҡтан; **снача́ла** баштан; **сгоряча́** ҡыҙыулыҡ менән; **смо́лоду** йәштән, йәш саҡтан

**СААДА́К** *м*; *ист.* һаҙаҡ (*йәйә, уҡ, уҡ башаҡы һымаҡ ҡоралдар һалып йөрөтә торған махсус һауыт*)

**СААМИ** *мн. нескл.* (*ед.* **саа́ми** *м* и *ж*) саамдар, саам халҡы; *см.* **саа́мы**

**СААМСКИЙ,** -ая, -ое саам ...ы; **саа́мский язы́к** саам теле

**САА́МЫ** *мн.* саамдар, саам халҡы (*Рәсәй Федерацияһының Кола ярымутрауында йәшәүсе халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе; уғыр-фин телдәренең береһендә һөйләшә*) // *ед.* **саа́м** *м* саам ир-аты; **саа́мка** *ж* саам ҡатын-ҡыҙы

**САБА́Н** *м* һабан (*ике төрәнле ағас һуҡа*)

**САБАНТУ́Й** *м* һабантуй (*яҙғы сәсеү эштәре тамамланғас үткәрелә торған халыҡ байрамы*)

**СА́БЕЛЬНИК** *м* һыуһын, ҡылысъяпраҡ, бысағүлән

**СА́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡылыс ...ы; **са́бельные но́жны** ҡылыс ҡыны; **са́бельный клино́к** ҡылыс йөҙө **2.** ҡылыслы(лар) ...ы, ҡылыслыларҙан торған; **са́бельные со́тни** ҡылыслылар йөҙө

**САБЗА́** *ж* сабза (*йөҙөмдөң төшһөҙ төрө*)

**САБЛЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое ҡылысҡа оҡшаш, ҡылыс рәүешле; **саблеви́дные рога́** ҡылыс рәүешле мөгөҙ

**САБЛЕОБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **саблеви́дный**

**САБЛИ́СТ** *м* ҡылыссы (*алышта ҡылыс ҡулланыу оҫталығын күрһәткән спортсы*)

**СА́БЛЯ** *ж* **1.** ҡылыс; **уда́рить са́блей** ҡылыс менән сабыу **2.** *обычно мн.* **са́бли**; *воен.* (*в кавалерии — единица счёта*) ҡылыс (*һыбайлы ғәскәр берәмеге*)

**САБОТА́Ж** *м* саботаж (*эшкә зыян килтереү маҡсатында ҡушылғанды үтәмәү йәки юрамал түбән кимәлдә башҡарыу күренеше*)

**САБОТА́ЖНИК** *м* и **САБОТА́ЖНИЦА** *ж* саботаж яһаусы, эшкә аяҡ салыусы

**САБОТА́ЖНИЧАТЬ** *несов.*; *разг. см.* **саботи́ровать**

**САБОТА́ЖНИЧЕСТВО** *с*; *разг.* саботаж, саботажсылыҡ

**САБОТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* саботаж яһау, эшкә аяҡ салыу

**САБОТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **саботи́ровать**

**СА́ВАН** *м* **1.** кәфен, мәйет күлдәге **2.** *перен.* япма, йәймә, юрған; **земля́ покры́та бе́лым са́ваном** ергә аҡ ҡарҙан юрған ябылған

**САВА́ННЫ** *мн.* (*ед.* **сава́нна** *ж*) саванна (*тропик бүлкәттең һирәк-һаяҡ ағас, ҡыуаҡ менән ҡапланған үләнле зонаһы*)

**САВРА́СЫЙ,** -ая, -ое (*о масти лошади*) ҡола; **савра́сая кобы́ла** ҡола бейә

**СА́ГА** *ж* сага (**1.** *Скандинавия һәм Ирландия халҡының героик хикәйәһе* **2.** *поэтик хикәйә, легенда*)

**САГАЙДА́К** *м*; *ист. см.* **саада́к**

**САГИТИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **агити́ровать** 2

**СА́ГО** *с нескл.* саго (*саго пальмаһының крахмалынан эшләнгән ярма; картуф, кукуруз крахмалынан суррогат*)

**СА́ГОВНИКИ** *мн.*; *бот.* саголылар (*пальма менән абағаға оҡшаш ялан́ғас орлоҡло тропик үҫемлектәр класы*)

**СА́ГОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** саго ...ы; **са́говая крупа́** саго ярмаһы **2.** саголы; **пиро́г с са́говой начи́нкой** саголы бәлеш ♦ **са́говая па́льма** саго пальмаһы

**САД** *м* баҡса; **фрукто́вый сад** емеш баҡсаһы ♦ **ботани́ческий сад** ботаника баҡсаһы (*ғилми учреждение*); **зи́мний сад** ҡышҡы баҡса (*үҫемлек һәм ағастар ултыртылған бүлмә*); **де́тский сад** *см.* **де́тский**

**САДАНУ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* **1.** (ныҡ итеп) һуғыу (ҡундырыу, тондороу); **садану́ть кулако́м** йоҙроҡ менән тондороу **2.** тейҙерә атыу, тейҙерә бәреү; **садану́ть из винто́вки** мылтыҡтан тейҙерә атыу

**САДИ́ЗМ** *м* **1.** садислыҡ, енси боҙоҡлоҡ **2.** залимлыҡ, йыртҡыслыҡ, ҡанһыҙлыҡ (*йыртҡыстарса язалауҙан, яфалауҙан алған ләззәт*)

**СА́ДИК** *м* **1.** *уменьш. от* **сад** **2.** *разг.* балалар баҡсаһы

**САДИ́СТ** *м* и **САДИ́СТКА** *ж* садист (*садислыҡҡа бирелгән кеше*)

**САДИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое садистар ...ы, садистарға хас; **сади́стская жесто́кость** садистарға хас ҡанһыҙлыҡ

**САДИ́ТЬ** *несов.*; *прост. см.* **сажа́ть**

**САДИ́ТЬСЯ** *несов. см.* **сесть**

**СА́ДКА I** *ж*; *спец. см.* **сажа́ть** 5; **са́дка кирпича́ для о́бжига** үртәү өсөн кирбес һалыу

**СА́ДКА II** *ж*; *спец. см.* **сесть — сади́ться** 3, 4; **са́дка пова́ренной со́ли** аш тоҙоноң ултырыуы; **са́дка сукна́** буҫтауҙың ултырыуы

**СА́ДКА III** *ж*; *охот.* һөсләтеү

**СА́ДКИЙ I,** -ая, -ое *разг.* ҡолаҡ тондорғос, ҡолаҡ ярғыс (*тауышҡа ҡарата*); **са́дкий то́пот копы́т** ҡолаҡ тондорғос тояҡ тауышы

**СА́ДКИЙ II,** -ая, -ое *спец.* ултыра (инә) торған (*туҡымаға ҡарата*); **са́дкое сукно́** ултыра торған буҫтау

**СА́ДНЕТЬ** и **САДНЕ́ТЬ** *несов.*; *разг. см.* **са́днить**

**СА́ДНИТЬ** и **САДНИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* йәрәхәтләү, сыйыу, (сәнсеп) һыҙырыу, әрнетеү; **ве́тки мали́ны са́днят ру́ки** ҡурай еләге ботаҡтары ҡулдарҙы һыҙыра **2.** *обычно безл.* әрнеп (янып, ҡысытып, ҡымырйып) ауыртыу; **в го́рле садни́т** тамаҡ төбө ҡысытып ауырта

**САДО́ВНИК** *м* и **САДО́ВНИЦА** *ж* баҡсасы, емеш үҫтереүсе

**САДО́ВНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** баҡсасы булып эшләү **2.** баҡсасылыҡ менән шөғөлләнеү

**САДО́ВНИЧЕСТВО** *с* баҡсасы шөғөлө

**САДО́ВНИЧИЙ,** -ья, -ье баҡсасы ...ы; **садо́вничий инструме́нт** баҡсасы ҡоралы

**САДОВО́Д** *м* баҡсасы, баҡсасылыҡ белгесе, баҡса үҫтереүсе

**САДОВО́ДСТВО** *с*; *в разн. знач.* баҡсасылыҡ; **занима́ться садово́дством** баҡсасылыҡ менән шөғөлләнеү; **уче́бник по садово́дству** баҡсасылыҡ буйынса дәреслек

**САДОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое баҡсасылыҡ ...ы, баҡсасылар ...ы; **садово́дческий коллекти́в** баҡсасылар коллективы

**САДО́ВО-ПА́РКОВЫЙ,** -ая, -ое баҡса-парк ...ы; **садо́во-па́рковое иску́сство** баҡса-парк сәнғәте

**САДО́ВЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* баҡса ...ы; **садо́вая доро́жка** баҡса һуҡмағы; **садо́вая ви́шня** баҡса сейәһе; **садо́вая о́пытная ста́нция** баҡса тәжрибә станцияһы ♦ **голова́ садо́вая** *кто* һиңмай, ахмаҡ баш

**САДО́К I** *м* **1.** яһалма быуа (*балыҡ үрсетеү өсөн*); **отса́живать малько́в в садки́** селбәрәләрҙе быуаға ебәреү **2.** һеүән; **живоры́бный садо́к** тере балыҡ һаҡлау һеүәне **3.** (*помещение*) ситлек; **кро́личий садо́к** өй ҡуяндары ситлеге **4.** *охот.* (*ловушка*) ситән ау, ҡапҡан, тоҙаҡ; **во́лчий садо́к** бүре ҡапҡаны

**САДО́К II** *м*; *уменьш. от* **сад**

**САЁК** *м* болан балаһы

**СА́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое сайка ...ы; **са́ечное те́сто** сайка ҡамыры

**СА́ЖА** *ж* ҡором; **печна́я са́жа** мейес ҡоромо; **чи́стить дымохо́д от са́жи** төтөнлөктөң ҡоромон таҙартыу ♦ **дела́ как са́жа бела́** *шутл.* эштәр хөрт (насар, шәптән түгел)

**САЖА́ЛКА** *ж* ултыртҡыс (*картуф һәм йәшелсә ултыртыу машинаһы*); **четырёхрядна́я сажа́лка** дүрт рәтле ултыртҡыс

**САЖА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ултырта торған; **сажа́льная маши́на** ултырта торған машина

**САЖА́ЛЬЩИК** *м* и **САЖА́ЛЬЩИЦА** *ж* үҫемлек ултыртыусы

**САЖА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что, за что, на что* и *с неопр.* ултыртыу; **сажа́ть госте́й за стол** ҡунаҡтарҙы өҫтәл артына ултыртыу; **сажа́ть за рабо́ту** эшкә ултыртыу **2.** *что* ултыртыу, ергә төшөрөү; **сажа́ть самолёт** самолётты ултыртыу **3.** *что* ултыртыу, сәсеү (*үҫемлеккә ҡарата*); **сажа́ть огурцы́** ҡыяр ултыртыу; **сажа́ть ли́пу** йүкә ултыртыу **4.** *кого-что* ябыу, урынлаштырыу, бикләү, ултыртыу; **сажа́ть пти́цу в кле́тку** ҡошто ситлеккә ябыу; **сажа́ть в тюрьму́** төрмәгә бикләү **5.** *что* тығыу, ултыртыу, һалыу, ҡуйыу (*бешереү, яндырыу, киптереү өсөн*); **сажа́ть хлеб в печь** икмәкте мейескә тығыу; **сажа́ть снопы́ в ови́н** көлтәләрҙе эүенгә ултыртыу **6.** *что* тамыҙыу, таплау; **сажа́ть на пла́тье кля́ксы** күлдәккә ҡара тамыҙыу **7.** *кого*; *прост.* (*проваливать на экзамене*) имтиханда үткәрмәү, насар билдәһе ҡуйыу **8.** (*ограничивать в чём-л.*) ултыртыу; **сажа́ть на дие́ту** диетаға ултыртыу ♦ **сажа́ть ку́рицу (у́тку) на я́йца** тауыҡты (өйрәкте) баҫырға ултыртыу

**САЖА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **сажа́ть**

**СА́ЖЕНЕЦ** *м* **1.** үрсетмәлек; **са́женцы пло́до́вых дере́вьев** емеш ағастары үрсетмәлектәре **2.** үҫенте

**СА́ЖЕНКА** и **САЖЁНКА: сажёнками** ҡолас ташлап (*йөҙөү стиле*); **плыть сажёнками** ҡолас ташлап йөҙөү

**СА́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **сади́ть**

**САЖЕ́ННЫЙ** и **САЖЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*мерой в одну сажень*) сажинлы; **саже́нный масшта́б** сажинлы масштаб **2.** *разг.* (бик) ҙур, (бик) киң, (бик) тәрән; **саже́нные шаги́** бик ҙур аҙым; **саже́нный снег** бик тәрән ҡар

**СА́ЖЕНЫЙ,** -ая, -ое ултыртылған, ултыртып үҫтерелгән, үрсетмәлектәрҙән үҫтерелгән; **са́женые дере́вья** ултыртылған ағастар

**САЖЕ́НЬ** и **СА́ЖЕНЬ** *ж* сажин (*метрик системаға тиклем ҡулланылған, 2,134 метрға тигеҙ оҙонлоҡ үлсәү берәмеге*) ♦ **коса́я саже́нь в плеча́х** *см.* **косо́й**

**СА́ЖИВАТЬ** *несов.*; *разг. см.* **сажа́ть**

**СА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** *см.* **сади́ться 2.** *страд. от* **са́живать**

**САЗ** *м*; *муз.* саз (*Кавказда, Көнсығыш илдәрендә киң таралған ҡыллы музыка ҡоралы*)

**САЗА́Н** *м* һаҙан (*балыҡ*)

**САЗА́НИЙ,** -ья, -ье һаҙан ...ы

**САЙГА́** *ж* и **САЙГА́К** *м* сайғаҡ (*ҡыуыш мөгөҙлөләр ғаиләһенә ҡараған ҡуш тояҡлы, көйшәүсе дала хайуаны*)

**СА́ЙДА** *ж* сайда (*трескалар ғаиләһенә ҡараған диңгеҙ балығы*)

**СА́ЙКА** *ж* сайка (*тәм-том ҡушып бешерелгән аҡ икмәк*)

**СА́ЙРА** *ж* сайра (*балыҡ*)

**САК** *м* **1.** *уст.* саҡ (*беше туҡыманан тегелгән юл сумкаһы*) **2.** (балыҡ) һөҙгөс; **лови́ть ры́бу са́ком** балыҡты һөҙгөс менән тотоу

**СА́КВА** *ж* артмаҡ; **седе́льная са́ква** эйәр артмағы

**САКВОЯ́Ж** *ж* саквояж (*юл сумкаһы*); **ко́жаный саквоя́ж** күн саквояж

**СА́КЛЯ** *ж* сакля (*Кавказдағы тау халыҡтары өйөнөң атамаһы*)

**САКРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* йола ...ы, хөрәфәти, дини (*дини йолаларҙы, төрлө хөрәфәтте сағылдырған*); **сакра́льный хара́ктер та́нцев** хөрәфәти характерҙағы бейеүҙәр

**САКРАМЕНТА́ЛЬНОСТЬ** *ж* изгелек

**САКРАМЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*обрядовый*) йола ...ы, хөрәфәти, дини; **сакramента́льное значе́ние** йола мәғәнәһе **2.** изге, табына торған; **сакramента́льное ме́сто** изге урын **3.** йолаға әйләнгән, ғәҙәткә ингән; **сакramента́льный вопро́с** йолаға әйләнгән һорау

**САКСАУ́Л** *м* сағсауыл (*япраҡһыҙ сүл ағасы*); **бе́лый саксау́л** аҡ сағсауыл; **чёрный саксау́л** ҡара сағсауыл

**САКСАУ́ЛОВЫЙ,** -ая, -ое сағсауыл ...ы; **саксау́ловые за́росли** сағсауыл ҡыуаҡлығы

**САКСАУ́ЛЬНИК** *м* сағсауыл ҡыуаҡлығы

**САКСОФО́Н** *м*; *муз.* саксофон (*баҫмаҡлы тынлы музыка ҡоралы*)

**САЛА́ГА** *м*; *разг.*, *пренебр.*, *шутл.* (*молодой солдат, курсант, матрос и т.п.*) салага

**САЛА́ЗКИ** *мн.* **1.** бәләкәй сана; **ката́ться на сала́зках** бәләкәй санала шыуыу **2.** *тех.* сана; **сала́зки тока́рного станка́** ҡырыу станогының санаһы

**САЛА́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бәләкәй сана ...ы; **сала́зочные поло́зья** бәләкәй сана табаны **2.** *тех.* саналы; **сала́зочный пресс** саналы пресс

**САЛА́КА** и **САЛА́КУШКА** *ж* салака, салакушка (*ваҡ ҡына диңгеҙ балығы*)

**САЛАМА́НДРА** *ж* саламандра (*кеҫәрткегә оҡшаған ер-һыу хайуаны*)

**САЛАМА́НДРОВЫЙ,** -ая, -ое саламандра ...ы; **салама́ндровая ко́жа** саламандра тиреһе

**САЛАМА́ТА** *ж* саламат (*кеҫәл йәки шыйыҡ бутҡа*); **свари́ть салама́ту** саламат бешереү

**САЛА́Т** *м* **1.** *бот.* салат, салат үләне **2.** салат; **мясно́й сала́т** итле салат; **капу́стный сала́т** кәбеҫтә салаты; **пригото́вить сала́т** салат әҙерләү

**САЛА́ТНИК** *м* и **САЛА́ТНИЦА** *ж* салат һауыты

**САЛА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** салат ...ы; **сала́тный лист** салат япрағы; **сала́тная гря́дка** салат түтәле **2.** салатҡа тигән, салат өсөн әҙерләнгән; **сала́тная капу́ста** салатҡа тигән кәбеҫтә **3.** (*о цвете*) асыҡ (һарғылт) йәшел, йәшкелт; **сала́тный цвет** һарғылт йәшел төҫ

**СА́ЛИНГ** *м*; *мор.* салинг (*кәрәк-яраҡ беркетелә торған брус рамдар*)

**СА́ЛИТЬ** *несов.* *кого-что* **1.** майға буяу, майлау, майландырыу **2.** *разг.* (*пачкать*) кергә ҡатырыу, керләндереү **3.** әбәк әйтеп ҡасыу, әбәкләү (*балалар уйынында*)

**СА́ЛИТЬСЯ** *несов.* **1.** майға буялыу, майланыу **2.** *разг.* кергә ҡатыу, керләнеү **3.** *страд.* *от* **са́лить** 1, 2

**САЛИЦИ́ЛКА** *ж*; *разг.* салицилка (*салицил натры*)

**САЛИЦИ́ЛОВЫЙ: салици́ловая кислота́** салицил кислотаһы (*дарыу матдәләре һәм буяуҙар алыу өсөн ҡулланылған органик берләшмә*); **салици́ловый натр** салицил натры (*салицил кислотаһы тоҙо*)

**СА́ЛО** *с* **1.** (*свиное*) сало; **копчёное са́ло** ыҫланған сало **2.** май, туң май; **гуси́ное са́ло** ҡаҙ майы; **нутряно́е са́ло** эс майы **3.** (*смазочное вещество*) май **4.** сыйҙым, шыя (*көҙгө һыу өҫтөндәге ҡатыр-ҡатмаҫ боҙ*); **покрыва́ться са́лом** сыйҙым менән ҡапланыу ♦ **ко́жное са́ло** тире майы

**САЛО́Л** *м* салол (*эс дарыуы*)

**САЛО́Н** *м*; *в разн. знач.* салон; **вы́ставочный сало́н** күргәҙмә салоны; **худо́жественный сало́н** сәнғәт салоны; **сало́н авто́буса** автобус салоны

**САЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое салон ..ы; **сало́нная му́зыка** салон музыкаһы

**САЛО́П** *м* салоп (*ҡатын-ҡыҙҙарҙың бороңғо өҫ кейеме*)

**САЛОТО́П** *м* туң май иретеүсе

**САЛОТО́ПЕННЫЙ,** -ая, -ое туң май ...ы, туң май ирткән (иретә торған); **салото́пенный заво́д** туң май заводы

**САЛФЕ́ТКА** *ж* **1.** салфетка, майлыҡ; **бума́жная салфе́тка** ҡағыҙ майлыҡ; **льняна́я салфе́тка** етен майлыҡ **2.** (*небольшая скатерть*) салфетка, ашъяулыҡ; **постла́ть на стол салфе́тку** өҫтәлгә салфетка йәйеү

**СА́ЛЬДО** *с нескл.*; *бухг.*, *торг.*, *экон.* сальдо, ҡалдыҡ

**СА́ЛЬНИК** *м* **1.** *анат.* ҡарынъяу, эс майы; (*у лошади*) ҡаҙы(лыҡ) (*йылҡы малында*) **2.** *тех.* сальник (*механизмдарға пар, һауа, газ һ.б. үткәрмәүсе ҡулайлама*)

**СА́ЛЬНИКОВЫЙ,** -ая, -ое *тех.* сальник ...ы; **са́льниковое кольцо́** сальник ҡулсаһы

**СА́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** *спец.* майлылыҡ, ҡалын май ҡатламы; **сви́ньи высо́кой са́льности** ҡалын май ҡатламлы суҫҡалар **2.** оятһыҙ (әшәке, әҙәпһеҙ) һүҙ; **говори́ть са́льности** әшәке һүҙҙәр әйтеү

**СА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** май (*туң майҙан* (*эс майынан*) *эшләнгән*); **са́льная свеча́** май шәм; **са́льное пятно́** май табы **2.** үтә һимеҙ, шау май; **са́льная свини́на** үтә һимеҙ суҫҡа ите **3.** майланып (майға ҡатып, керләнеп, ҡайышланып) бөткән (ҡатҡан); **са́льный воротни́к** ҡайышланып ҡатҡан яға **4.** (*непристойный*) оятһыҙ, әшәке, әҙәпһеҙ; **са́льный анекдо́т** әҙәпһеҙ анекдот ♦ **са́льные же́лезы** *анат.* май биҙҙәре

**СА́ЛЬТО** *с нескл.* сальто (*спортсмен йәки артист бер снарядтан икенсе снарядҡа һикергәндә баш аша һауала тулы әйләнгән әйләнеш*); **сде́лать са́льто** сальто яһау

**СА́ЛЬТО-МОРТА́ЛЕ** *с нескл.* сальто-мортале (*акробаттарҙың һауала баш аша әйләнеп һикереүе*)

**САЛЮ́Т** *м*; *в разн. знач.* салют; **артиллери́йский салю́т** артиллерия салюты; **произвести́ салю́т** салют биреү

**САЛЮТОВА́ТЬ** *сов.*, *несов.* салют биреү, салютлау

**САЛЯ́МИ** *ж нескл.* салями (*ыҫланған колбаса төрө*)

**САМ** *м* (сама *ж*, само *с*) *мест.* **1.** үҙем, үҙең, үҙе; **он сам э́то сказа́л** ул быны үҙе әйтте; **он сам реши́л помо́чь** ул үҙе ярҙам итергә булды **2.** (*для подчёркивания, выделения лица или предмета*) үҙе, үҙе үк; **сама́ жизнь такова́** тормош үҙе үк шулай **3.** *в знач. сущ.* **сам** *м* и **сама́** *ж*; *прост.* (*хозяин, глава*) үҙе; **сам приказа́л** үҙе бойорҙо ♦ **быть сами́м собо́й** һәр ваҡыт үҙең булып ҡалыу; **сам себе́ голова́** үҙе баш, үҙе түш; үҙенә үҙе хужа; **сам (сама́, само́) за себя́ говори́т** *см.* **говори́ть**; **са́ми с уса́ми** *см.* **усы́**; **сам (сама́, само́) по себе́**: 1) үҙ алдына; 2) айырым алғанда; **сам (сама́, само́) собо́й** үҙенән-үҙе; **само́ собо́й разуме́ется** үҙенән-үҙе аңлашыла, әлбиттә; **сам не свой** *см.* **свой**

**САМА́** *ж мест. см.* **сам**

**САМА́Н** *м* саман (*балсыҡ менән ваҡланған һалам ҡатыш һуғылған кирбес; шул кирбескә ҡушылған һалам*); **стро́ить дом из сама́на** самандан өй һалыу

**САМА́ННЫЙ,** -ая, -ое саман, самандан; **сама́нная постро́йка** саман ҡаралты

**САМБИ́СТ** *м* самбосы (*самбо көрәше менән шөғөлләнгән спортсы*); **соревнова́ние самби́стов** самбосылар ярышы

**СА́МБО** *с нескл.* самбо (*ысын һуғыш ысулдарын ҡулланған спорт көрәше*)

**САМБУ́К** *м* самбук (*шәкәр менән йомортҡа ағы ҡушып һалған емеш иҙмәһе*)

**САМЕ́Ц** *м* ата, иркәк; **са́мка** *ж* инә, орғасы; **саме́ц-оле́нь** ата болан; **верблю́д-саме́ц** ата дөйә; **са́мка ло́ся** инә мышы

**СА́МИ** *мн. мест. см.* **сам**

**САМО́** *с мест. см.* **сам**

**САМО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "үҙ", "үҙенән", "үҙен", "үҙ-үҙенде" һ.б. мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **самоана́лиз** үҙ-үҙенә анализ яһау; **самовоспламене́ние** үҙенән-үҙе тоҡанып китеү; **самодви́жущийся** үҙ йөрөшлө

**САМОБИЧЕВА́НИЕ** *с* **1.** үҙ-үҙеңде ғазаплау (*дин йолаһы буйынса*) **2.** *перен.* өҙгөләнеү, үкенеү, үҙ-үҙеңде шелтәләү

**САМОБРА́НКА: ска́терть-самобра́нка** тылсымлы ашъяулыҡ (*әкиәттәрҙә үҙенән-үҙе төрлө ашамлыҡтар менән тула торған*)

**САМОБЫ́ТНОСТЬ** *ж* үҙенә бер төрлөлөк, үҙенсәлек

**САМОБЫ́ТНЫЙ,** -ая, -ое үҙенә бер төрлө (башҡа), үҙенә генә хас, үҙенсәлекле; **самобы́тная культу́ра** үҙенсәлекле мәҙәниәт; **самобы́тный хара́ктер** үҙенә бер төрлө холоҡ

**САМОВА́Р** *м* самауыр; **электри́ческий самова́р** электр самауыры; **поста́вить самова́р** самауыр ҡуйыу

**САМОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое самауыр ...ы; **самова́рный кран** самауыр һеңгәге

**САМОВЛА́СТИЕ** *с* сикләнмәгән хакимиәт (власть)

**САМОВЛА́СТНЫЙ,** -ая, -ое сикләнмәгән хакимиәтле (властлы)

**САМОВЛЮБЛЁННОСТЬ** *ж* үҙ-үҙенә ғашиҡлыҡ, үҙ-үҙен яратыусы

**САМОВЛЮБЛЁННЫЙ,** -ая, -ое үҙ-үҙенә ғашиҡ, үҙ-үҙенә иҫе киткән; **самовлюблённый челове́к** үҙ-үҙенә ғашиҡ кеше

**САМОВНУШЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙен ышандырыу (инандырыу)

**САМОВОЗБУЖДЕ́НИЕ** *с*; *физ., тех.* үҙенән-үҙе барлыҡҡа килеү; **самовозбужде́ние колеба́ний** тирбәлеүҙең үҙенән-үҙе барлыҡҡа килеүе

**САМОВОЗВЕЛИ́ЧЕНИЕ** *с* үҙ-үҙен бик ныҡ (күккә күтәреп) маҡтау, үҙенән-үҙе бик ҡәнәғәт, үҙ-үҙен күтәрмәләү

**САМОВОЗГОРА́ЕМОСТЬ** *ж*; *спец.* үҙенән-үҙе янып (тоҡанып) китеү

**САМОВОЗГОРА́НИЕ** *с см.* **самовозгора́ться**; **самовозгора́ние се́на в стога́х** кәбәндәге бесәндең үҙенән-үҙе яныуы; **самовозгора́ние угля́** күмерҙең үҙенән-үҙе тоҡанып китеүе

**САМОВОЗГОРА́ТЬСЯ** *несов. см.* **самовозгоре́ться**

**САМОВОЗГОРЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *спец.* үҙенән-үҙе яныу, үҙенән-үҙе тоҡанып китеү

**САМОВО́ЛИЕ** *с* үҙ белдеклелек, башбаштаҡлылыҡ

**САМОВО́ЛКА** *ж* **1.** *прост.* рөхсәтһеҙ (ризалыҡһыҙ) китеү **2.** *в знач. нареч.* **самово́лкой**; *прост., уст.* (*о вступлении в брак без разрешения, благословения*) никахһыҙ, рөхсәтһеҙ, фатиха алмайынса

**САМОВО́ЛЬНИК** *м* и **САМОВО́ЛЬНИЦА** *ж*; *разг.* үҙ белдеге менән эш иткән кеше, башбаштаҡлыҡ ҡылған кеше

**САМОВО́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* башбаштаҡлыҡ итеү, башбаштаҡланыу, үҙ белдеге менән эш итеү

**САМОВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*своевольный*) үҙе теләгәнсә (үҙ белдеге менән) эш иткән; **самово́льный челове́к** үҙ белдеге менән эш иткән кеше **2.** рөхсәтһеҙ, ризалыҡһыҙ; **самово́льная отлу́чка** рөхсәтһеҙ китеү

**САМОВОСПИТА́НИЕ** *с* үҙеңде үҙең тәрбиәләү, үҙеңә үҙең тәрбиә биреү

**САМОВОСПЛАМЕНЕ́НИЕ** *с*; *спец.* үҙенән-үҙе янып (тоҡанып) китеү; **самовоспламене́ние не́фти** нефттең үҙенән-үҙе тоҡанып китеүе

**САМОВОСПЛАМЕНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *спец.* үҙенән-үҙе янып (тоҡанып) китеү

**САМОВОСХВАЛЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде маҡтау

**САМОГО́Н** *м* көмөшкә, самогон

**САМОГО́НКА** *ж*; *разг. см.* **самого́н**

**САМОГО́ННЫЙ,** -ая, -ое көмөшкә, самогон, көмөшкә ...ы, самогон ...ы, көмөшкә (самогон) ҡыуа торған; **самого́нный аппара́т** көмөшкә ҡыуғыс

**САМОГО́НЩИК** *м* и **САМОГО́НЩИЦА** *ж*; *разг.* көмөшкә ҡыуыусы, самогонсы

**САМОДВИЖЕ́НИЕ** *с*; *филос.* үҙхәрәкәт

**САМОДВИ́ЖУЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся үҙе йөрөй (хәрәкәт итә) торған, үҙе йөрөмәле, үҙйөрөшлө; **самодви́жущийся экскава́тор** үҙйөрөшлө экскаватор ♦ **самодви́жущаяся ми́на** үҙйөрөшлө мина, торпеда

**САМОДЕ́ЙСТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее үҙенән-үҙе эшләй торған; **самоде́йствующий затво́р** үҙенән-үҙе эшләй торған затвор

**САМОДЕ́ЛКА** *ж*; *разг.* ҡулдан яһалған (эшләнгән) нәмә

**САМОДЕ́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.*; *прост.* ҡулдан (үҙең) яһау

**САМОДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡулдан (үҙең) яһаған; **самоде́льный радиоприёмник** ҡулдан яһалған радиоалғыс

**САМОДЕРЖА́ВИЕ** *с* самодержавие, сикләнмәгән хакимлыҡ (*батша, монарх, императорҙың сикләнмәгән хакимлығы һәм шул хакимлыҡҡа нигеҙләнгән дәүләт идара системаһы*); **ца́рское самодержа́вие** батша самодержавиеһы

**САМОДЕРЖА́ВНЫЙ,** -ая, -ое самодержавие ...ы, сикләнмәгән; **самодержа́вный строй** самодержавие ҡоролошо; **самодержа́вная власть** сикләнмәгән хакимлыҡ

**САМОДЕ́РЖЕЦ** *м* батша

**САМОДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ** *ж*; *в разн. знач.* үҙешмәкәрләк, үҙешмәкәр сәнғәт; **ве́чер самоде́ятельности** үҙешмәкәрлек кисәһе; **допусти́ть самоде́ятельность** үҙешмәкәрлеккә юл ҡуйыу

**САМОДЕ́ЯТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* үҙешмәкәр; **самоде́ятельный хор** үҙешмәкәр хор; **самоде́ятельные обще́ственные сою́зы** үҙешмәкәр йәмәғәт берекмәләре

**САМОДИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое самодий ...ы ♦ **самоди́йские языки́** самодий телдәре

**САМОДИ́ЙЦЫ** *мн.* самодийҙар (*самодий телдәрендә һөйләшкән халыҡтарҙың дөйөм атамаһы*)

**САМОДИСЦИПЛИ́НА** *ж* үҙ-үҙеңде тота белеү, эске тәртип

**САМОДОВЛЕ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее *книжн.* **1.** үҙенә етерлек булған **2.** үҙенә айырым әһәмиәте (ҡиммәте) булған

**САМОДОВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое үҙе менән ҡәнәғәт, үҙ-үҙенә иҫе киткән, маҡтанырға (маһайырға) яратҡан; **самодово́льный вид** үҙе менән ҡәнәғәт ҡиәфәт

**САМОДОВО́ЛЬСТВО** *с* ҡуҡрайғанлыҡ, үҙ-үҙенән ҡәнәғәтлек

**САМОДУ́Р** *м* и **САМОДУ́РКА** *ж* дыуамал (үҙһүҙле, үҙбелдекле) кеше

**САМОДУ́РСТВО** *с* дыуамаллыҡ, үҙһүҙлелек, үҙбелдеклелек

**САМОДУ́РСТВОВАТЬ** *несов.* дыуамалланыу, үҙһүҙләнеү

**САМОЗАБВЕ́НИЕ** *с* онотолоу, үҙ-үҙеңде онотоу, йән-тән менән (мөкиббән) бирелеү; **рабо́тать с самозабве́нием** үҙ-үҙеңде онотоп эшләү, эшкә мөкиббән бирелеү

**САМОЗАБВЕ́ННОСТЬ** *ж см.* **самозабве́ние**

**САМОЗАБВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое үҙ-үҙеңде онотоп, йәне-тәне менән бирелгән; **самозабве́нная любо́вь** йән-тән менән бирелеп һөйөү

**САМОЗАКА́ЛИВАНИЕ** *с*; *спец.* үҙенән-үҙе сыныҡыу; **самозака́ливание ста́ли** ҡоростоң үҙенән-үҙе сыныҡыуы

**САМОЗАПИ́СЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее үҙе (үҙенән-үҙе) яҙа торған; **самозапи́сывающие контро́льно-измери́тельные прибо́ры** үҙенән-үҙе яҙа торған контроль-үлсәү приборҙары

**САМОЗАЩИ́ТА** *ж* үҙ-үҙеңде һаҡлау, һаҡланыу, үҙ-үҙеңде яҡлау; **инсти́нкт самозащи́ты** үҙ-үҙеңде һаҡлау инстинкты

**САМОЗВА́НЕЦ** *м* и **САМОЗВА́НКА** *ж* ялған (башҡа) исемдә йөрөүсе

**САМОЗВА́НСТВО** *с* ялған (ят) исем йөрөтөү

**САМОЗВА́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** ялған (башҡа) исем йөрөткән; **самозва́ный царь** ялған исем йөрөткән батша **2.** үҙ-үҙен тәҡдим иткән; **самозва́ный председа́тель** үҙ-үҙен тәҡдим иткән рәйес

**САМОИНДУ́КЦИЯ** *ж*; *физ.* үҙ индукция (*ток үҙгәргәндә үткәргестә хәрәкәт иттереүсе көстөң тыуыуы*)

**САМОИСПЫТА́НИЕ** *с* үҙ-үҙен һынау

**САМОИСТЯЗА́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде ғазаплау

**САМОКА́Т** *м* самокат

**САМОКА́ТНЫЙ I,** -ая, -ое самокат ...ы

**САМОКА́ТНЫЙ II,** -ая, -ое ҡулдан баҫылған; **самока́тные ва́ленки** ҡулдан баҫылған быйма

**САМОКОНТРО́ЛЬ** *м* үҙ-үҙеңде контролдә тотоу (тикшереү)

**САМОКРИ́ТИКА** *ж* үҙ-үҙеңде тәнҡитләү, үҙ-ара тәнҡит; **занима́ться самокри́тикой** үҙ-үҙеңде тәнҡитләү менән шөғөлләнеү

**САМОКРИТИ́ЧНОСТЬ** *ж* үҙ-үҙеңде тәнҡитләү, үҙ-ара тәнҡит; **самокрити́чность в рабо́те** эштәге үҙ-ара тәнҡит

**САМОКРИТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое үҙ-үҙенә тәнҡит менән ҡарау, үҙен-үҙе тәнҡитләү; **самокрити́чное выступле́ние** үҙен-үҙе тәнҡитләү рухындағы сығыш

**САМОКРУ́ТКА** *ж*; *разг.* төрөлгән тәмәке, кәҙә аяғы

**САМОЛЁТ** *м* самолёт; **пассажи́рский самолёт** пассажирҙар самолёты; **реакти́вный самолёт** реактив самолёт; **лете́ть самолётом** самолёт менән осоу

**САМОЛЁТНЫЙ,** -ая, -ое самолёт ...ы; **самолётное шасси́** самолёт шассийы

**САМОЛЁТОВОЖДЕ́НИЕ** *с*; *ав.* самолёт йөрөтөү (*самолёт йөрөтөүҙең теорияһы һәм практикаһы*)

**САМОЛЁТО-ВЫ́ЛЕТ** *м*; *ав.* самолёттың осош яһауы

**САМОЛЁТОСТРОЕ́НИЕ** *с* самолёт эшләп сығарыу (яһау)

**САМОЛЁТОСТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое самолёт ...ы, самолёт эшләп сығарыу (яһау) ...ы; **самолётострои́тельный заво́д** самолёт эшләп сығарыу заводы

**САМОЛЕЧЕ́НИЕ** *с* үҙеңде-үҙең дауалау (*табип ярҙамынан башҡа*)

**САМОЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* (бер) үҙе генә

**САМОЛЮ́БЕЦ** *м* үҙен-үҙе (үҙен генә) яратҡан кеше

**САМОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое үҙен (генә) яратҡан, һүҙ күтәрмәүсән, тәкәббер; **самолюби́вый челове́к** үҙен генә яратҡан кеше

**САМОЛЮ́БИЕ** *с* намыҫ, үҙен (генә) яратыу, мин-минлек, тәкәбберлек; **ло́жное самолю́бие** ялған тәкәбберлек; **заде́ть самолю́бие** *чьё-л. кемдеңдер* намыҫына тейеү

**САМОЛЮБОВА́НИЕ** *с* үҙенә үҙе һоҡланыу

**САМОМНЕ́НИЕ** *с* үҙеңде ҙурға һанау (юғары ҡуйыу), мин-минлек, тәкәбберлек, һауалылыҡ

**САМОНАБЛЮДЕ́НИЕ** *с* үҙеңде күҙәтеү, үҙеңде генә ҡарау (ҡайғыртыу)

**САМОНАДЕ́ЯННОСТЬ** *ж* үҙ-үҙеңә саманан тыш инанғанлыҡ, үҙ көсөңә бик ныҡ (артыҡ) ышаныу

**САМОНАДЕ́ЯННЫЙ,** -ая, -ое үҙ-үҙенә саманан тыш (артыҡ) ышанған, үҙ көсөнә ныҡ ышанған; **самонаде́янный челове́к** үҙ көсөнә бик ныҡ ышанған кеше

**САМОНАЗВА́НИЕ** *с* үҙенә үҙе биргән (ҡушҡан) исем; **самоназва́ние наро́да** халыҡтың үҙенә үҙе биргән исеме; **су́оми — самоназва́ние фи́ннов** суоми — финдарҙың үҙенә үҙе ҡушҡан исеме

**САМООБВИНЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде ғәйепләү

**САМООБЛАДА́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде тота алыу (белеү), аптырап (ҡаушап) ҡалмау; **не теря́ть самооблада́ния** үҙ-үҙеңде тотоп алып ҡалыу

**САМООБЛИЧЕ́НИЕ** *с* үҙ ғәйебен үҙе асыу, үҙен үҙе фаш итеү

**САМООБЛОЖЕ́НИЕ** *с* үҙ-ара һалым

**САМООБМА́Н** *м* үҙ-үҙеңде алдау

**САМООБОГАЩЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде байытыу (байыҡтырыу)

**САМООБОЖА́НИЕ** *с* үҙең менән маһайыу

**САМООБОЛЬЩА́ТЬСЯ** *несов.* алданып (йыуанып) йөрөү

**САМООБОЛЬЩЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде алдап (йыуатып) йөрөү

**САМООБОРО́НА** *ж* үҙ-үҙеңде һаҡлау (яҡлау), һаҡланыу

**САМООБРАЗОВА́НИЕ** *с* үҙ алдыңа уҡыу (белем алыу); **занима́ться самообразова́нием** үҙ алдыңа белем алыу менән шөғөлләнеү

**САМООБРАЗОВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое үҙ алдыңа уҡыу (белем алыу) ...ы

**САМООБСЛУ́ЖИВАНИЕ** *с* үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү ...ы; **магази́н самообслу́живания** үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү магазины

**САМООБУЧЕ́НИЕ** *с* үҙ аллы өйрәнеү, үҙ аллы уҡыу

**САМООГОВО́Р** *м*; *юр.* үҙеңә яла яғыу, ғәйепте үҙ өҫтөңә алыу

**САМООГРАНИЧЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде сикләү, үҙеңә үҙең сик ҡуйыу

**САМООКУПА́ЕМОСТЬ** *ж* зыянһыҙ эшләү, аҡланыш; **самоокупа́емость предприя́тия** предприятиеның зыянһыҙ эшләүе; **самоокупа́емость валю́тных опера́ций** валюта операцияларының аҡланышы

**САМООПЛОДОТВОРЕ́НИЕ** *с*; *биол.* үҙ-үҙен аталандырыу, үҙенән-үҙе аталаныу

**САМООПРАВДА́НИЕ** *с* үҙеңде үҙең аҡлау

**САМООПРЕДЕЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **самоопредели́ться 2.** *полит.* үҙбилдәләнеш, үҙбилдәләнеү; **пра́во на́ций на самоопределе́ние** милләттәрҙең үҙбилдәләнеш хоҡуғы

**САМООПРЕДЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* (*найти своё место в жизни*) тейешле (үҙ) урыныңды табыу

**САМООПРЕДЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **самоопредели́ться**

**САМООПРОКИ́ДЫВАЮЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся үҙе ауҙарылмалы (ауҙарылышлы); **самоопроки́дывающийся ку́зов** үҙе ауҙарылмалы кузов

**САМООПЫЛЕ́НИЕ** *с*; *бот.* үҙенән-үҙе һеркәләнеү

**САМООПЫЛИ́ТЕЛЬ** *м*; *бот.* үҙенән-үҙе һеркәләнә торған үҫемлек

**САМООПЫЛЯ́ТЬСЯ** *несов.*; *бот.* үҙенән-үҙе һеркәләнеү

**САМООСВОБОЖДЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙен ҡотҡарыу

**САМООСУЖДЕ́НИЕ** *с* үҙен үҙе ғәйепләү

**САМООТВЕ́РЖЕННОСТЬ** *ж* **1.** үҙен үҙе аямау; **самоотве́рженность ма́тери** әсәнең үҙен үҙе аямауы **2.** фиҙаҡәрлек; **проявля́ть самоотве́рженность** фиҙаҡәрлек күрһәтеү

**САМООТВЕ́РЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҙ-үҙен аямай торған; **самоотве́рженный челове́к** үҙ-үҙен аямай торған кеше **2.** фиҙаҡәр; **самоотве́рженный труд** фиҙаҡәр хеҙмәт

**САМООТВО́Д** *м* үҙен үҙе кире ҡағыу (*һайлауҙа һ.б.*)

**САМООТРАВЛЕ́НИЕ** *с* үҙенән-үҙе ағыуланыу

**САМООТРЕЧЕ́НИЕ** *с* баш тартыу

**САМООТРЕШЁННОСТЬ** *ж* үҙеңдән ваз кисеү, үҙеңде онотоу, онотолоу

**САМООТЧЁТ** *м* үҙеңә иҫәп-хисап биреү, үҙеңде белеү

**САМООХРА́НА** *ж* үҙеңде һаҡлау (яҡлау)

**САМООЦЕ́НКА** *ж* үҙеңде баһалау, үҙ баһаңды белеү

**САМООЧИЩЕ́НИЕ** *с*; *спец.* таҙарыныу; **самоочище́ние по́чвы** тупраҡтың таҙарыныуы

**САМООЩУЩЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде һиҙеү (тойоу)

**САМОПА́Л** *м* самопал (*ябай ҡоролошло мылтыҡ*)

**САМОПИ́ШУЩИЙ,** -ая, -ее үҙе яҙа торған; **самопи́шущий прибо́р** үҙе яҙа торған прибор

**САМОПОДГОТО́ВКА** *ж* үҙ аллы әҙерләнеү

**САМОПОЖЕ́РТВОВАНИЕ** *с* үҙ-үҙеңде ҡорбан итеү (фиҙа ҡылыу)

**САМОПОЗНА́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде (асылыңды) танып белеү

**САМОПРОВЕ́РКА** *ж* үҙ-үҙеңде тикшереү

**САМОПРОИЗВО́ЛЬНОСТЬ** *ж* үҙенән-үҙе булыу (хасил булыу, килеп сығыу)

**САМОПРОИЗВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое үҙенән-үҙе булған, үҙенән-үҙе хасил була (килеп сыға) торған; **самопроизво́льное движе́ние** үҙенән-үҙе булған хәрәкәт

**САМОПРЯ́ЛКА** *ж* еп иләү машинаһы

**САМОРАЗВИВА́ЮЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся үҙ алдына үҫешкән

**САМОРАЗВИ́ТИЕ** *с* **1.** үҙ алдына үҫешеү, үҙлегенән үҫеш **2.** *филос. см.* **самодвиже́ние**

**САМОРАЗГРУЖА́ЮЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся үҙбушатҡыс; **саморазгружа́ющийся ваго́н** үҙбушатҡыс вагон

**САМОРАСЧЁТ** *м* үҙ аллы расчёт, ҡулаҡсаһыҙ расчёт яһыу

**САМОРЕКЛА́МА** *ж* үҙ-үҙеңде маҡтау (күрһәтергә тырышыу)

**САМОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** таҙа, тәбиғи, саф; **саморо́дное зо́лото** саф алтын **2.** (*о дарованиях, душевных качествах*) тәбиғи, тыумыштан; **саморо́дный тала́нт** тәбиғи талант

**САМОРО́ДОК** *м* самородок (**1.** *металл, алтын, платинаның һ.б. тәбиғәттә саф көйө осраған эре бөртөгө, киҫәге* **2.** *тыумыштан талантлы кеше*)

**САМОСА́Д** *м* самосад (*кеше үҙе сәсеп үҫтергән тәмәке*)

**САМОСА́ДКА I** *ж*; *разг. см.* **самоса́д**

**САМОСА́ДКА II** *ж*; *спец.* күл тоҙо (*күл төбөнә ултырған тоҙ*)

**САМОСА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* **1.** үҙе ултырған, ултырма; **самоса́дочная соль** ултырма тоҙ **2.** ултырма тоҙо булған; **самоса́дочное о́зеро** ултырма тоҙо булған күл

**САМОСВА́Л** *м* самосвал (*үҙбушатҡыс машина*)

**САМОСЕ́В** *м* тыу үҫемлек

**САМОСЕ́Й** *м* и **САМОСЕ́ЙКА** *ж* тыу (үҫемлек); **мак-самосе́йка** тыу мәк

**САМОСНАБЖЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде тәьмин итеү

**САМОСОВЕРШЕ́НСТВОВАНИЕ** *с* үҙ-үҙеңде камиллаштырыу

**САМОСОГРЕВА́НИЕ** *с*; *спец.* үҙенән-үҙе йылыныу (яныу); **самосогрева́ние зерна́** игендең үҙенән-үҙе яныуы

**САМОСОЖЖЕ́НИЕ** *с* үҙеңде утта яндырыу, үҙеңә ут төртөү

**САМОСОЗЕРЦА́НИЕ** *с* үҙ хыялыңа (хистойғоңа) сумыу (бирелеү)

**САМОСОЗНА́НИЕ** *с* үҙаң (*тормошта, йәмғиәттә үҙ-үҙеңде, үҙеңдең тотҡан урыныңды тулыһынса аңлау хәле*); **национа́льное самосозна́ние** милли үҙаң

**САМОСОХРАНЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде һаҡлау; **инстинкт самосохране́ния** үҙ-үҙеңде һаҡлау инстинкты

**САМОСПЛА́В** *м* (йылғала) бүрәнә ағыҙыу (*ағым көсө менән, буксирһыҙ*)

**САМОСТОЯ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* үҙаллылыҡ, мөстәҡиллек; **полити́ческая самостоя́тельность госуда́рства** дәүләттең сәйәси үҙаллылығы; **приуча́ть ребёнка к самостоя́тельности** баланы үҙаллылыҡҡа өйрәтеү

**САМОСТОЯ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*независимый*) үҙ аллы, мөстәҡил; **самостоя́тельное госуда́рство** үҙ аллы дәүләт **2.** ирекле, үҙ аллы, буйһонмаусан; **самостоя́тельный челове́к** ирекле кеше **3.** мөстәҡил рәүештә, үҙ аллы (*үҙ көсө менән эшләнгән*); **самостоя́тельная рабо́та** үҙ аллы эш **4.** (*оригинальный*) үҙенә башҡа (бер төрлө), үҙенә генә хас, үҙенсәлекле; **челове́к с самостоя́тельным взгля́дом** үҙенә генә хас ҡарашлы кеше **5.** айырым, әһәмиәтле, үҙ аллы; **самостоя́тельная глава́ диссерта́ции** диссертацияның үҙ аллы бүлеге

**САМОСТРЕ́Л I** *м* **1.** һаплы йәйә (*боронғо һуғыш ҡоралы*) **2.** *охот.* (*ловушка*) йәйәгә оҡшаш ҡапҡан

**САМОСТРЕ́Л II** *м*; *разг.* үҙен үҙе яралаған һалдат (*хәрби хеҙмәттән ҡотолоу өсөн*)

**САМОСТРЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое үҙенән-үҙе (автоматик рәүештә) ата торған; **самостре́льная винто́вка** үҙенән-үҙе ата торған винтовка

**САМОСУ́Д** *м* самосуд, судһыҙ (үҙ белдеге менән) язалау

**САМОТЁК** *м* **1.** үҙ яйына (үҙ көйөнә, үҙ ағышына) ағыу (ҡойолоу) **2.** үҙ ағышына (үҙ яйына) ҡуйылыу; **пусти́ть де́ло на самотёк** эште үҙ ағышына ҡуйыу

**САМОТЁКОМ** *нареч.* **1.** үҙ яйы (ағышы) менән; **сы́паться самотёком** үҙ яйы менән ҡойолоу; **вода́ идёт самотёком** һыу үҙ ағышы менән килә **2.** үҙ ағышы менән, стихиялы рәүештә; **де́ло пошло́ самотёком** эш үҙ ағышы менән китте

**САМОТЁЧНЫЙ,** -ая, -ое үҙ ағышы (үҙ яйы, үҙ көйө) менән, үҙағышлы; **самотёчное ороше́ние** үҙ ағышы менән һуғарыу

**САМОТКА́НЫЙ,** -ая, -ое *прост.* ҡулдан һуғылған (туҡылған); **самотка́ное сукно́** ҡулдан һуғылған тула; **самотка́ный ковёр** ҡулдан һуғылған келәм

**САМОУБИ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое үҙе өсөн хәүефле (зарарлы, ҡурҡынычлы)

**САМОУБИ́ЙСТВО** *с* үҙен үҙе үлтереү, үҙенә үҙе ҡул һалыу

**САМОУБИ́ЙЦА** *м* и *ж* үҙен үлтереүсе, үҙенә үҙе ҡул һалыусы

**САМОУВАЖЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде хөрмәтләү (ихтирам итеү), үҙ ҡәҙереңде белеү

**САМОУВЕ́РЕННОСТЬ** *ж* үҙеңә ныҡ (үҙеңә саманан тыш) ышаныу, үҙ-үҙеңә ышанғанлыҡ

**САМОУВЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое үҙенә ныҡ (саманан тыш) ышанған; **самоуве́ренный челове́к** үҙенә ныҡ ышанған кеше

**САМОУДОВЛЕТВОРЕ́НИЕ** *с* үҙеңдән үҙең ҡәнәғәт (риза) булыу

**САМОУДОВЛЕТВОРЁННОСТЬ** *ж* үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәт (риза) булыу

**САМОУДОВЛЕТВОРЁННЫЙ,** -ая, -ое үҙенән ҡәнәғәт (риза) булған; **самоудовлетворённый челове́к** үҙенән ҡәнәғәт булған кеше

**САМОУНИЖЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде кәмһетеү (түбәнһетеү, меҫкенәйтеү)

**САМОУНИЧТОЖЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде һәләк (юҡ) итеү

**САМОУПРАВЛЕ́НИЕ** *с* үҙидара, идара итеү; **студе́нческое самоуправле́ние** студенттар үҙидараһы

**САМОУПРА́ВНЫЙ,** -ая, -ое баш бирмәгән, башбаштаҡ; **самоупра́вный челове́к** башбаштаҡ кеше

**САМОУПРА́ВСТВО** *с* башбаштаҡлыҡ; **занима́ться самоупра́вством** башбаштаҡлыҡ ҡылыу

**САМОУПРА́ВСТВОВАТЬ** *несов.* башбаштаҡланыу, ҡанун тәртибен боҙоу, башбаштаҡлыҡ ҡылыу (итеү)

**САМОУСОВЕРШЕ́НСТВОВАНИЕ** *с см.* **самосоверше́нствование**

**САМОУСПОКА́ИВАТЬСЯ** *несов. см.* **самоуспоко́иться**

**САМОУСПОКОЕ́НИЕ** *с* үҙ-үҙеңде тынысландырыу, вайымһыҙлыҡҡа (ғәмһеҙлеккә) бирелеү

**САМОУСПОКО́ЕННОСТЬ** *ж* үҙ-үҙеңде тынысландырыу, вайымһыҙлыҡҡа (ғәмһеҙлеккә) бирелгәнлек

**САМОУСПОКО́ИТЬСЯ** *сов.* тынысланып ҡалыу, ғәмһеҙ ҡыланыу, вайымһыҙлыҡҡа (ғәмһеҙлеккә) бирелеү

**САМОУСТРАНЕ́НИЕ** *с см.* **самоустрани́ться — самоустраня́ться**

**САМОУСТРАНИ́ТЬСЯ** *сов.* ситләшеү, үҙ эшеңдән ситләшеү, эшләмәү

**САМОУСТРАНЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **самоустрани́ться**

**САМОУТВЕРЖДЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* үҙеңде раҫлау

**САМОУЧИ́ТЕЛЬ** *м* үҙ алдыңа өйрәнеү әсбабы, үҙөйрәткес; **самоучи́тель игры́ на бая́не** үҙ алдыңа баянда уйнарға өйрәнеү әсбабы

**САМОУ́ЧКА** *м* и *ж*; *разг.* **1.** үҙе (үҙ алдына, үҙ аллы) өйрәнгән (уҡыған) кеше; **инжене́р-самоу́чка** үҙ алдына уҡыған инженер; **худо́жник-самоу́чка** үҙ алдына өйрәнгән рәссам **2.** *в знач. нареч.* **самоу́чкой** үҙенән-үҙе, үҙ алдыңа; **самоу́чкой вы́учиться чита́ть** үҙ алдыңа уҡырға өйрәнеү

**САМОХВА́Л** *м*; *разг.* маҡтансыҡ, ҡуҡыр, ҡоро (буш) ҡыуыҡ (*үҙен үҙе маҡтарға яратҡан кеше*)

**САМОХВА́ЛЬСТВО** *с*; *разг.* шапырыныу, маҡтаныусанлыҡ

**САМОХО́Д** *м* самоход (*үҙйөрөшлө механизм*)

**САМОХО́ДКА** *ж*; *разг. см.* **самохо́д**

**САМОХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое үҙйөрөшлө, үҙе йөрөй торған; **самохо́дный комба́йн** үҙйөрөшлө комбайн

**САМОЦВЕ́Т** *м* аҫыл таш, йәүһәр, шәмсыраҡ; **ура́льские самоцве́ты** Урал шәмсыраҡтары, Урал йәүһәрҙәре

**САМОЦВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәбиғи төҫтәге, йылтырап (емелдәп) торған (*аҫыл таштарға ҡарата*) **2.** йәүһәр (шәмсыраҡ) ҡашлы; **самоцве́тный пе́рстень** йәүһәр ҡашлы йөҙөк **3.** *уст.* (*цветной*) төрлө төҫтәге, төҫлө; **самоцве́тные бу́сы** төрлө төҫтәге мәрйен

**САМОЦЕ́ЛЬ** *ж* үҙмаҡсат; **сде́лать самоце́лью** үҙмаҡсат итеү

**САМОЧИ́ННЫЙ,** -ая, -ое үҙ белдегенсә, законһыҙ рәүештә, башбаштаҡлыҡ менән; **самочи́нные де́йствия** законһыҙ эштәр

**САМОЧИ́НСТВО** *с* үҙ белдегеңсә эш итеү (хәл ҡылыу), законһыҙлыҡ, башбаштаҡлыҡ

**САМОЧУ́ВСТВИЕ** *с* хәл-әхүәл, кәйеф

**САМУ́М** *м* сәмүм (*ком бураны, эҫе һул еле*)

**САМУРА́И** *мн.* (*ед.* **самурай** *м*); *ист.* самурай (*феодаль Японияла ваҡ дворяндарҙың хәрби ҡатламы*)

**САМУРА́ЙСКИЙ,** -ая, -ое самурай ...ы

**САМШИ́Т** *м* самшит (*бик ҡаты үҙағаслы мәңге йәшел көньяҡ ағасы йәки ҡыуаҡлығы*)

**САМШИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое самшит ...ы; **самши́товая ро́ща** самшит урманы; **самши́товая трость** самшит ҡул таяғы

**СА́МЫЙ,** -ая, -ое *мест.* **1.** (*именно, как раз*) тап, нәҡ, тап үҙе; **в э́том са́мом ме́сте** тап бына ошо урында; **в э́ту са́мую мину́ту** тап бына ошо минутта **2.** (*как раз*) тап, нәҡ, уҡ, үк; **с са́мого утра́** иртәнән үк; **над са́мой голово́й** тап баш өҫтөндә **3.** *см.* **сам** 1, 2; **са́мый факт рожде́ния ребёнка отра́ден** баланың донъяға килеү факты үҙе үк ҡыуаныслы **4.** (*при образовании превосходной степени прилагательных*) иң; **са́мый бы́стрый** иң шәп; **са́мый у́мный** иң аҡыллы; **са́мый большо́й** иң ҙур ♦ **в са́мом де́ле** ысынлап та; **в са́мый раз**: 1) бик ваҡытлы, иң кәрәкле саҡта; 2) тап-таман

**САН** *м* дәрәжә, исем; **носи́ть высо́кий сан** юғары дәрәжәгә эйә булыу

**САН...** *ҡайһы бер ҡушма һүҙҙәрҙең "санитария" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **санвра́ч** санитария табибы

**САНАТО́РИЙ** *м* шифахана, санаторий; **де́тский санато́рий** балалар шифаханаһы; **туберку-**

**лёзный санато́рий** үпкә ауырыуҙары шифаханаһы; **лечи́ться в санато́рии** шифаханала дауаланыу

**САНАТО́РНО-КУРО́РТНЫЙ,** -ая, -ое шифахана-курорт ...ы; **санато́рно-куро́ртная ка́рта** шифахана-курорт картаһы

**САНАТО́РНЫЙ,** -ая, -ое шифахана ...ы, санаторий ...ы; **санато́рный врач** шифахана табибы; **санато́рный режи́м** шифахана көн тәртибе

**САНА́ЦИЯ** *ж* санация (**1.** *мед. ауыҙ ҡыуышлығын һауыҡтырыу өсөн үткәрелгән дауалау саралары* **2.** *иҡт. банкыларҙы һәм эре предприятиеларҙы бөлөүҙән һаҡлау маҡсаты менән дәүләт тарафынан күрелгән саралар*)

**САНБА́Т** *м* (*санитарный батальон*) санбат (*санитария батальоны*)

**САНГВИ́НИК** *м* сангвиник (*шат, етеҙ хәрәкәтле, ҡыҙыу тәбиғәтле кешеләргә хас темперамент төрө*)

**САНГВИНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сангвиник; **сангвини́ческий хара́ктер** сангвиник холоҡ

**САНГИ́НА** *ж* **1.** сангина, ҡанҡәләм (*тышһыҙ йомшаҡ ҡәләм*); **рисова́ть санги́ной** сангина менән һүрәт төшөрөү **2.** сангина (*сангина менән төшөрөлгән рәсем*)

**САНДА́Л** и *уст.* **САНТА́Л** *м* һандал (*хуш еҫле майы булған мәңге йәшел тропик ағас һәм шул ағастан алынған буяу*)

**САНДАЛЕ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **сандале́та** *ж*) сандалет (*йәйге еңел аяҡ кейеме*)

**САНДА́ЛИИ** *мн.* (*ед.* **санда́лия** *ж*) сандалый; **наде́ть санда́лии** сандалый кейеү

**САНДА́ЛОВЫЙ** и *уст.* **САНТА́ЛОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** һандал ...ы; **санда́ловое де́рево** һандал ағасы; **санта́ловое ма́сло** һандал майы **2.** *в знач. сущ.* **санта́ловые** *мн.*; *бот.* һандал һымаҡтар (*коньяҡ үҫемлектәре ғаиләһе*)

**САНДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сандалый...ы; **санда́льный ремешо́к** сандалый ҡайышы

**СА́НДВИЧ** *м* сандвич (*ике телеме араһына балыҡ, ит һ.б. ҡыҫтырылған икмәк*); **са́ндвич с ры́бой** балыҡлы сандвич

**САНДРУЖИ́НА** *ж* (*санитарная дружина*) сандружина (*санитар дружинаһы*)

**СА́НИ** *мн.* сана; **са́ни на подре́зах** тимер табанлы сана; **са́ни-лежа́нки** терһәкле сана; **ката́ться на саня́х** санала шыуыу

**САНИНСТРУ́КТОР** *м* (*санитарный инструктор*) санинструктор (*санитария инструкторы*)

**САНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *мед., эк.* санация яһау; **сани́ровать по́лость рта** ауыҙ ҡыуышлығына санация яһау; **сани́ровать у́гольную промы́шленность** күмер сәнәғәтенә санация яһау

**САНИТА́Р** *м* санитар; **санита́рка** *ж* санитарка (*кесе медицина хеҙмәткәре*); **рабо́тать санита́ром** санитар булып эшләү

**САНИТАРИ́Я** *ж* санитария (*дөйөм таҙалыҡты һәм халыҡтың һаулығын һаҡлау саралары*)

**САНИТА́РНЫЙ,** -ая, -ое санитария ...ы, санитар; **санита́рные пра́вила** санитария ҡағиҙәләре; **санита́рный врач** санитария табибы; **санита́рный по́езд** санитар поезд ♦ **санита́рный батальо́н** санитария батальоны; **санита́рный инстру́ктор** санитария инструкторы; **санита́рное просвеще́ние** санитария мәғарифы; **санита́рная те́хника** санитария техникаһы; **санита́рная часть** санитария часы (*ғәскәри частарҙа медицина хеҙмәте күрһәтеүсе бүлек*); **санита́рный у́зел** санитария узелы

**САНКЦИОНИ́РОВАТЬ** *сов., несов.*; *юр., книжн.* санкциялау, санкция (рөхсәт) биреү; **санкциони́ровать аре́ст** ҡулға алыуға санкция биреү

**СА́НКЦИЯ** *ж* санкция (**1.** *юр. юғары инстанцияның ниндәйҙер эште башҡарырға юридик көс биреүе* **2.** *юр. тәртип боҙған, енәйәт эшләгән кешегә ҡарата дәүләт органдарының иҫкәртеүе* **3.** *халыҡ-ара хоҡуҡта үҙенең халыҡ-ара йөкләмәһен үтәмәгән өсөн, йәки халыҡ-ара хоҡуҡ ҡағиҙәһен боҙған дәүләткә ҡарата ҡулланылған йоғонто сараһы*)

**СА́ННЫЙ,** -ая, -ое сана ...ы; **са́нный путь** сана юлы; **са́нные поло́зья** сана табаны

**САНОВИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **сано́вный** 1; **2.** эре (тәкәббер) ҡиәфәтле, эре, ҡуҡыр; **санови́тый челове́к** тәкәббер ҡиәфәтле кеше

**САНО́ВНИК** *м* **1.** сановник (*революцияға тиклем Рәсәйҙә юғары дәрәжәле ҙур түрә*) **2.** *ирон.* һауалы, тәкәббер, эре кеше (*хужаға ҡарата*)

**САНО́ВНИЦА** *ж* сановниктың ҡатыны

**САНО́ВНОСТЬ** *ж* эре (тәкәббер) ҡиәфәт, эрелек

**САНО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*имеющий высокий чин*) юғары дәрәжәле, ҙур чинлы **2.** (*важный, внушительный*) һауалы, эре, тәкәббер; **сано́вный челове́к** һауалы кеше

**СА́НОЧНИК** *м* **1.** *уст.* йөк ташыусы (*һөйрәп ташыған кеше*) **2.** санасы (*сана спортсыһы*)

**СА́НОЧНЫЙ,** -ая, -ое сана ...ы; **са́ночные поло́зья** сана табаны

**САНПРОПУСКНИ́К** *м* санпропускник (*санитария-профилактика саралары үткәрә торған учреждение*)

**САНПРОСВЕ́Т** *м* (*санитарное просвещение*) санпросвет (*санитария белеме таратыу*)

**САНСКРИ́Т** *м* санскрит (*боронғо һинд теленең әҙәби яҡтан эшкәртелгән бер төрө*)

**САНСКРИТО́ЛОГ** *м* санскритолог (*санскрит белгесе*)

**САНСКРИТОЛО́ГИЯ** *ж* санскритология (*санскритты өйрәнә торған фән*)

**САНСКРИ́ТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** санскрит ...ы; **санскри́тский язы́к** санскрит теле **2.** санскрит телендәге; **санскри́тская ру́копись** санскрит телендәге ҡулъяҙма

**САНТЕ́ХНИКА** *ж* (*санитарная техника*) сантехника (*санитария техникаһы*)

**САНТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое (*санитарно-технический*) сантехника ...ы; **сантехни́ческое обору́дование** сантехника йыһаздары

**САНТИГРА́ММ** *м* сантиграмм (*грамдың йөҙҙән бер өлөшө*)

**САНТИ́М** *м* сантим (*Францияла, Бельгияла һ.б. илдәрҙә франктың йөҙҙән бер өлөшөнә тиң булған ваҡ аҡса*)

**САНТИМЕ́НТЫ** *мн.*; *разг.* хис-тойғоға бирелеү ♦ **разводи́ть сантиме́нты** хис-тойғоға бирелеү

**САНТИМЕ́ТР** *м* сантиметр (*метрҙың йөҙҙән бер өлөшө*); **дели́ть на сантиме́тры** сантиметрҙарға бүлеү

**САНТИМЕТРО́ВЫЙ,** -ая, -ое сантиметрлы (*бер сантиметр оҙонлоҡтағы*) ♦ **сантиметро́вая ле́нта** сантиметрлы таҫма

**САНУ́ЗЕЛ** *м* (*санитарный узел*) санузел (*санитария узелы*); **санузлы́ жилы́х домо́в** торлаҡ йорттарҙың санузелдары

**САНЧА́СТЬ** *ж* (*санитарная часть*) санчасть (*санитария часы*)

**САП I** *м* маңҡа, маңҡа ауырыуы (*йылҡы малында*); **заболе́ть са́пом** маңҡа булыу

**САП II** *м*; *разг. см.* **сопе́ние**

**СА́ПА** *ж*; *воен.* сапа (*траншеяның бер төрө*); **винтообра́зная са́па** бормалы сапа ♦ **ти́хой са́пой** аҫтыртын, йәшертен, һиҙҙермәҫтән

**САПЁР** *м* сапёр; **служи́ть сапёром** сапёр булып хеҙмәт итеү

**САПЁРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сапёр(ҙар) ...ы; **сапёрный батальо́н** сапёрҙар батальоны **2.** сапёрлыҡ ...ы; **сапёрное де́ло** сапёрлыҡ эше

**САПНО́Й,** -ая, -ое маңҡалы, маңҡа ауырыулы; **сапна́я ло́шадь** маңҡалы ат

**САПОГИ́** *мн.* (*ед.* **сапо́г** *м*) итек; **ко́жаные сапоги́** күн итек; **зи́мние сапоги́** ҡышҡы итек; **боло́тные сапоги́** һаҙҙа кейә торған итек ♦ **под сапого́м (быть)** йәберләнеп йәшәү; **два сапога́ па́ра** икеһе бер ҡалып, икеһе бер сыбыҡтан ҡыуылған, силәгенә күрә ҡапҡасы; **сапоги́ всмя́тку** буш һүҙ, туҙға яҙмаған нәмә; **сапоги́-скорохо́ды** *см.* **скорохо́д**

**САПО́ЖКИ** и **САПОЖКИ́** *мн.* (*ед.* **сапожо́к** *м*) итектәр; **рези́новые сапо́жки** резина итектәр

**САПО́ЖНИК** *м* **1.** итексе, итек тегеүсе, ситексе, ситек тегеүсе; **рабо́тать сапо́жником** итексе булып эшләү **2.** *прост.*, *пренебр.* (*о неумелом, неискусном в каком-л. деле человеке*) булдыҡһыҙ (эшкинмәгән) кеше

**САПО́ЖНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* итек (ситек) тегеү менән шөғөлләнеү, итек (ситек) тегеү

**САПО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** итек (ситек) ...ы, итексе (ситексе) ...ы; **сапо́жная щётка** итек щёткаһы; **сапо́жный нож** итексе бысағы **2.** итек тегеү ...ы, итек ...ы; **сапо́жная мастерска́я** итек тегеү оҫтаханаһы

**САПФИ́Р** *м* сапфир, зәңгәр яҡут (*зәңгәр йәки күк төҫтәге аҫыл таш*)

**САПФИ́РНЫЙ** и **САПФИ́РОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** сапфир (зәңгәр яҡут) ...ы; **сапфи́рные се́рьги** сапфир ҡашлы алҡа **2.** (*цвета сапфира*) сапфир төҫлө, зәңгәр

**САРА́Й** *м* һарай; **дровяно́й сара́й** утын һарайы; **постро́ить сара́й** һарай һалыу

**САРА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое һарай ...ы; **сара́йная дверь** һарай ишеге

**САРАНЧА́** *ж* саранча, ҡара сиңерткә (*туры ҡанатлылар төркөмөнә ҡараған, яу булып осоп йөрөп, игенде, үләнде бөтөргән зарарлы ауыл хужалығы ҡоротҡосо*)

**САРАНЧО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** саранча ...ы, ҡара сиңерткә ...ы; **саранчо́вая личи́нка** ҡара сиңерткә ҡарышлауығы **2.** *в знач. сущ.* **саранчо́вые** *мн.*; *зоол.* саранчалар

**САРАНЧУ́К** *м* бала саранча (*ҡанаты сығып килгән саранча*)

**САРАФА́Н** *м* сарафан (**1.** *урыҫ ҡатындарының еңһеҙ итеп тегелгән оҙон итәкле күлдәге* **2.** *еңһеҙ итеп тегелгән ҡатын-ҡыҙ күлдәге*)

**САРАФА́ННЫЙ,** -ая, -ое сарафан ...ы, сарафанлыҡ; **сарафа́нный си́тец** сарафанлыҡ ситса

**САРАЦИ́НСКИЙ** и **САРАЧИ́НСКИЙ,** -ая, -ое сарацин ...ы, сарачин ...ы; **сараци́нское населе́ние** сарацин халҡы ♦ **сараци́нское (сарачи́нское) пшено́** *уст.* дөгө

**САРАЦИ́НЫ** и **САРАЧИ́НЫ** *мн.* (*ед.* **сараци́н** и **сарачи́н** *м*) сарациндар, сарачиндар (*Урта быуатта европалыларҙың ғәрәптәрҙе, шулай уҡ яҡын Көнсығышта йәшәгән ҡайһы бер халыҡтарҙы атап йөрөткән исеме*)

**САРДЕ́ЛЬКА I** *м* сарделька (*сосиска төрө*)

**САРДЕ́ЛЬКА II** *ж см.* **тю́лька**

**САРДИ́НА** *ж* сардина (*сельдтар ғаиләһенә ҡараған ваҡ диңгеҙ балығы*)

**САРДИ́НКА** *ж см.* **сарди́на**

**САРДИ́ННЫЙ** и **САРДИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое сардина ...ы; **сарди́новый про́мысел** сардина тотоу (аулау) кәсебе

**САРДО́НИКС** *м* сардоникс (*аҡыҡтың бер төрө*)

**САРДОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *книжн.* мыҫҡыллы, зәһәрле, әсе, уҫал, мәсхәрәле; **сардони́ческий смех** әсе көлөү

**СА́РЖА** *ж* саржа (*ебе диагональ һуғылған кизе-мамыҡ йә ебәк эслек өсөн туҡыма*); **ро́зовая са́ржа** ал саржа

**СА́РЖЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** саржа; **са́ржевая подкла́дка** саржа эслек **2.** саржа, саржа ...ы; **са́ржевое произво́дство** саржа етештереү

**САРКА́ЗМ** *м* сарказм (**1.** *мыҫҡыллы әсе көлөү* **2.** *әсе, зәһәр көлөү менән белдерелгән шелтә йәки уҫҡәртмә*)

**САРКАСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сарказмлы, сәнскеле, зәһәр, саркастик; **саркасти́ческая улы́бка** зәһәр йылмайыу

**САРКО́МА** *ж* саркома (*һөйәк, тән туҡымаһындағы яман шеш*); **сарко́ма косте́й** һөйәк саркомаһы; **сарко́ма ко́жная** тире саркомаһы

**САРКОФА́Г** *м* саркофаг (*боронғо халыҡтарҙа: таш, ағас йәки башҡа нәмәнән биҙәкләп яһалған табут*); **саркофа́г царя́** батша саркофагы

**САРМА́ТСКИЙ,** -ая, -ое сармат …ы; **сарма́тские курга́ны** сармат ҡурғандары

**САРМА́ТЫ** *мн.* (*ед.* **сарма́т** *м*) сарматтар (*беҙҙең эраға тиклем VI—IV бб. Волга, Аҙау, Ҡара диңгеҙ буйы һәм Урал алды далаларында йәшәгән күсмә ҡәбиләләрҙең дөйөм атамаһы*)

**САРПИ́НКА** *ж* сарпинка (*буй-буй йәки шаҡмаҡлы йоҡа кизе-мамыҡ туҡыма*)

**САРПИ́НКОВЫЙ,** -ая, -ое сарпинка; **сарпи́нковое пла́тье** сарпинка күлдәк

**САРЫ́Ч** *м* һар (*йыртҡыс ҡош*); **сары́ч го́рный** тау һары; **сары́ч мохноно́гий** дала һары

**САТАНА́** *м* иблис, ен, шайтан

**САТАНЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* үтә ныҡ асыуланыу, ныҡ ярһыу, ҡотороноу, енләнеү

**САТАНИ́НСКИЙ,** -ая, -ое **1.** иблис …ы **2.** (*злобный, коварный*) мәкерле, яуыз, яһил; **сатани́нская мысль** яуыз уй **3.** *разг.* (*неистовый*) шашып ҡоторонған (ярһыған); **сатани́нский ве́тер** шашып ҡоторонған ел

**САТЕЛЛИ́Т** *м* сателлит (**1.** *Боронғо Римда: хужаһын оҙатып йөрөгән ҡоралды ялсы* **2.** *формаль яҡтан ирекле, ғәмәлдә икенсе бер көслөрәк дәүләткә бойондороҡло булған дәүләт* **3.** *астр. планетаның эйәрсене*)

**САТИ́Н** *м* сатин (*уң яғы йылтырап торған беше кизе-мамыҡ туҡыма*); **бе́лый сати́н** аҡ сатин

**САТИНЕ́Т** *м* сатинет (*сатиндың йоҡа төрө*)

**САТИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое сатин; **сати́новое пла́тье** сатин күлдәк

**САТИ́РА** *ж* сатира (*тормоштағы кире яҡтарҙы әсе көлөү аша фашлау ысулы йәки шул ысул менән яҙылған әҫәр*); **о́страя сати́ра** әсе сатира

**САТИРИА́З** *м*; *мед.* сатириаз (*ирҙәрҙәге енси аҙғынлыҡ ауырыуы*)

**САТИ́РИК** *м* сатирик, сатирасы (*сатира әҫәре авторы*)

**САТИРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** сатира ..ы, сатирик; **сатири́ческий журна́л** сатирик журнал **2.** (*язвительно-насмешливый*) көлдөрөүгә нигеҙләнгән, көлкөлө, мыҫҡыллы; **сатири́ческий вид** көлкөлө ҡиәфәт

**САТИ́РЫ** *мн.* (*ед.* **сати́р** *м*) **1.** *в разн. знач.* сатир (*боронғо грек мифологияһында урман аллалары, уңыш килтереүсе көс, Дионистың свитаһы; хәйләкәр һәм аҙғын кеше*) **2.** *зоол.* сатирҙар, бәрхәт күбәләктәр (*күбәләктәр ғаиләһе*)

**САТРА́П** *м* сатрап (**1.** *боронғо Көнсығыш илдәренең ҡайһы бер хәрби-административ провинцияларында идара башлығы* **2.** *күсм., кит. залим, башбаштаҡ түрә*)

**САТУРА́ТОР** *м* сатуратор (*шыйыҡсаларҙы углекислый газға туйындыра торған ҡорамал*)

**САТУРА́ЦИЯ** *ж*; *спец.* сатурация, газландырыу (*шыйыҡсаларҙы углекислый газға туйындырыу*)

**СА́УНА** *ж* сауна (*фин мунсаһы*)

**САФЬЯ́Н** *м* сафьян (*юғары сифатлы күн*); **чёрный сафья́н** ҡара сафьян

**САФЬЯ́ННЫЙ** и **САФЬЯ́НОВЫЙ,** -ая, -ое сафьян; **сафья́нные сапоги́** сафьян итек; **кни́га в сафья́новом переплёте** сафьян тышлы китап

**СА́ХАР** *м*; *в разн. знач.* шәкәр; **быстрорастворúмый са́хар** тиҙ иреүсән шәкәр; **ко́лотый са́хар** ваҡланған шәкәр; **кусково́й са́хар** шаҡмаҡ(лы) шәкәр; **рафини́рованный са́хар** таҙартылған шәкәр; **виногра́дный са́хар** *спец.* йөҙөм шәкәре; **моло́чный са́хар** *спец.* һөт шәкәре ♦ **чай с са́харом** *см.* **чай**

**САХАРИ́МЕТР** и **САХАРИМЕ́ТР** *м* сахариметр (*иретмәләге шәкәр миҡдарын билдәләй торған оптик прибор*)

**САХАРИ́Н** *м* сахарин (*һыуҙа һәм спиртта насар ирей торған ныҡ татлы кристалл матдә*); **пить чай с сахари́ном** сахаринлап сәй эсеү

**САХАРИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое сахарин …ы; **сахари́новый порошо́к** сахарин онтағы

**СА́ХАРИСТОСТЬ** и **САХАРИ́СТОСТЬ** *ж* шәкәрлелек, шәкәрлелек дәрәжәһе; **сахари́стость свёклы** сөгөлдөрҙөң шәкәрлелеге

**СА́ХАРИСТЫЙ** и **САХАРИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** шәкәргә бай, шәкәрле; **са́харистые сорта́ свёклы** сөгөлдөрҙөң шәкәргә бай сорттары **2.** *спец.* шәкәр һымаҡ, шәкәр кеүек; **сахари́стые вещества́** шәкәр һымаҡ матдәләр

**СА́ХАРИТЬ** *несов. что*; *разг.* шәкәр һибеү (һалыу, ҡушыу), шәкәрләү, шәкәрле итеү; **са́харить те́сто** ҡамырға шәкәр ҡушыу

**СА́ХАРНИЦА** *ж* шәкәр һауыты

**СА́ХАРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шәкәр …ы; **са́харный песо́к** шәкәр ҡомо; **са́харная пу́дра** шәкәр онтағы; **са́харный householder** шәкәр заводы; **са́харная свёкла** шәкәр сөгөлдөрө **2.** шәкәр һалынған, шәкәрле, татлы; **са́харное пече́нье** татлы печенье; **са́харная вода́** шәкәрле һыу **3.** *перен.* үтә сөсө (татлы); **са́харная речь** үтә сөсө телмәр ♦ **са́харный диабе́т** шәкәр диабеты, шәкәр ауырыуы (*тәндә шәкәр үҙләшмәү арҡаһында булған*)

**САХАРОВА́Р** *м* шәкәр ҡайнатыусы кеше

**САХАРОВАРЕ́НИЕ** *с* шәкәр ҡайнатыу

**САХАРОВА́РЕННЫЙ,** -ая, -ое шәкәр ҡайнатыу …ы; **сахарова́ренный заво́д** шәкәр ҡайнатыу заводы; **сахарова́ренная промы́шленность** шәкәр ҡайнатыу сәнәғәте

**САХАРОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **сахарова́ренный**

**САХАРО́ЗА** *ж*; *спец.* сахароза (*татлы үҫемлектәрҙән — шәкәр ҡамышы, шәкәр сөгөлдөрө һ.б. — алынған шәкәр*)

**САХАРОНО́С** *м* татлы (шәкәр бирә торған) үҫемлектәр

**САХАРОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое татлы, шәкәр бирә торған; **сахароно́сные расте́ния** шәкәр бирә торған үҫемлектәр

**САЧО́К** *м* сүмес ау, йәтмә (*балыҡ тотоу өсөн*)

**СБА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *что*, *чего* и *без доп.* кәметеү, төшөрөү; **сба́вить це́ну** хаҡын төшөрөү **2.** (*уменьшить силу чего-л.*) кәметеү, әкренәйтеү; **сба́вить ско́рость** тиҙлекте кәметеү; **сба́вить в весе́** ауырлыҡты кәметеү; **сба́вить го́лос** тауышты әкренәйтеү

**СБА́ВИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* кәмеү; **удо́й сба́вился** һауым кәмене

**СБАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **сба́вить**

**СБАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сба́виться** **2.** *страд. от* **сбавля́ть**

**СБА́ГРИВАТЬ** *несов. см.* **сба́грить**

**СБА́ГРИТЬ** *сов.*; *прост.* ҡотолоу

**СБАЛАНСИ́РОВАТЬ** *сов.* **1.** тигеҙлек һаҡлау, тигеҙләнеү **2.** *что*; *бухг.* баланс сығарыу, баланс яһау

**СБЕ́ГАТЬ** *сов.*; *разг.* йүгереп барып килеү (ҡайтыу); **сбе́гать за хле́бом** икмәккә йүгереп барып килеү

**СБЕГА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **сбежа́ть** **2.** ҡыялатып төшөп тороу (урынлашыу), һалынып төшөп (эленеп) тороу

**СБЕГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сбежа́ться** **2.** (*о дорогах, речках и т.п.*) бергә ҡушылыу (йыйылыу)

**СБЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** (*бегом спуститься вниз*) йүгереп төшөү; **сбежа́ть по круто́му бе́регу** текә ярҙан йүгереп төшөү **2.** (*стечь — о жидкости*) ағып төшөү; **вода́ сбежа́ла в кана́ву** һыу канауға ағып төштө **3.** (*сойти, растаяв, — о снеге*) иреп бөтөү; **снег сбежа́л с поле́й** баҫыуҙарҙа ҡар иреп бөттө **4.** (*сойти, слиняв, — о краске*) уңып бөтөү **5.** (*исчезнуть — о румянце, улыбке и т.п.*) төҫө ҡасыу **6.** (*убежать*) ҡасыу, һыпыртыу, ҡасып (ташлап) китеү; **сбежа́ть с уро́ков** дәрестән ҡасып китеү **7.** *разг.* ташыу, ташып түгелеү; **молоко́ сбежа́ло** һөт ташты

**СБЕЖА́ТЬСЯ** *сов.* йүгерешеп килеп етеү (йыйылыу); **на крик сбежа́лись де́ти** тауышҡа балалар йүгерешеп килеп етте

**СБЕРЕГА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һаҡлыҡ ...ы; **сберега́тельная ка́сса** һаҡлыҡ кассаһы; **сберега́тельная кни́жка** һаҡлыҡ кенәгәһе

**СБЕРЕГА́ТЬ** *несов. см.* **сбере́чь**

**СБЕРЕГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сбере́чься** **2.** *страд. от* **сберега́ть**

**СБЕРЕЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сбере́чь — сберега́ть**; **отда́ть де́ньги на сбереже́ние** аҡсаны һаҡларға биреү **2.** *обычно мн.* **сбереже́ния** һаҡлыҡҡа йыйылған аҡса, йыйған аҡса

**СБЕРЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һаҡлау, һаҡлап алып ҡалыу; **сбере́чь здоро́вье** һаулыҡты һаҡлау; **сбере́чь ребёнка от просту́ды** баланы һыуыҡ тейеүҙән һаҡлап алып ҡалыу; **сбере́чь я́блони от моро́за** алманы өшөүҙән һаҡлау **2.** *что* (*сохранить неизрасходованным*) һаҡлыҡҡа йыйыу, йыйыу, һаҡлап тотоу; **сбере́чь небольшу́ю су́мму де́нег** бер аҙ аҡса йыйыу

**СБЕРЕ́ЧЬСЯ** *сов.* һаҡланыу, һаҡланып ҡалыу, янға ҡалыу; **сберегли́сь фронтовы́е письма́** фронт хаттары һаҡланып ҡалған

**СБЕРКА́ССА** *ж* (*сберегательная касса*) һаҡлыҡ кассаһы

**СБЕРКНИ́ЖКА** *ж* (*сберегательная книжка*) һаҡлыҡ кенәгәһе

**СБЕСИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* енләнеү, ҡотороноу

**СБИВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое туҡый (бешә, бутай) торған, туҡығыс, бутағыс; **сбива́льная маши́на** туҡығыс машина

**СБИВА́ТЬ** *несов. см.* **сбить**

**СБИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сби́ться** **2.** *страд. от* **сбива́ть**

**СБИ́ВЧИВОСТЬ** *ж* буталсыҡлыҡ, сыуалсыҡлыҡ

**СБИ́ВЧИВЫЙ,** -ая, -ое буталсыҡ, сыуалсыҡ; **сби́вчивый отве́т** буталсыҡ яуап

**СБИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сбить** **2.** *прил.* тупаҫланған, үтмәҫләнеп бөткән; **сби́тое ле́звие ножа́** үтмәҫләнеп бөткән бысаҡ йөҙө **3.** *прил.*; *разг.* салшайып (ашалып) бөткән, ҡыйыш баҫылған; **сби́тые каблуки́** салшайып бөткән үксә **4.** *прил.* туҡып күбекләндерелгән, ҡабартылған, күпертелгән; **сби́тые сли́вки** туҡып күбекләндерелгән ҡаймаҡ **5.** *прил.* (*сильно спутанный*) ойошҡан, кейеҙләнгән, сейәлгән; **сби́тая гри́ва** ойошҡан ял

**СБИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һуғып (бәреп) сығарыу, ҡағып (һуғып, бәреп) төшөрөү; **сбить я́блоко с я́блони** алманы ағасынан һуғып төшөрөү **2.** *кого-что* бәреп йығыу, ҡолата һуғыу, һуғып ҡолатыу; **сбить ке́гли** кеглиҙы ҡолата һуғыу **3.** *кого-что* атып (бәреп) төшөрөү; **сбить вра́жеский самолёт** дошман самолётын бәреп төшөрөү **4.** *кого-что* (*с боем оттеснить*) бәреп (ҡыуып) сығарыу; **сбить засло́н проти́вника** дошман ҡапламаһын бәреп сығарыу **5.** *что* (*притупить*) үтмәҫләү, үтмәҫләндереү, тупаҫландырыу (тупарлау), йөҙөн ҡайтарыу; **сбить ле́звие топора́** балтаны үтмәҫләү **6.** *разг.* үксә-табанды салшайтыу (ҡыйшайтыу), салшайта баҫыу; **сбить сапоги́** итекте салшайта баҫыу **7.** *разг.* һыҙыртыу, өйкәү (*тәнгә ҡарата*); **сбить пя́тку** үксәне өйкәү **8.** *кого-что*; *прям.*, *перен.* боҙоу, бутау, юлдан яҙҙырыу; **сбить пла́ны** планды боҙоу **9.** *что* төшөрөү, кәметеү; **сбить температу́ру** температураны төшөрөү **10.** *что* этмәләү, ҡороштороу, арлы-бирле ҡороу; **сбить я́щик из до́сок** таҡталарҙан йәшник этмәләү **11.** *что* бешеү, яҙыу, туҡыу; **сбить**

**желтки́** йомортҡа һарыһын туҡыу; **сбить ма́сло** май яҙыу ♦ **сбить спесь** кикреген төшөрөү

**СБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡыйшайыу, ҡыйшайып китеү; **га́лстук сби́лся** галстук ҡыйшайған **2.** *разг.* ҡыйшайып бөтөү, тапалып ҡыйшайып бөтөү, ҡыйыш баҫыу (*аяҡ кейеменә ҡарата*); **ту́фли сби́лись** туфли тапалып ҡыйшайып бөттө **3.** *с чего* (*заблудиться*) аҙашыу, юлдан яҙыу **4.** яңылышыу, буталыу, (эҙмә-эҙлекте) юғалтыу; **сби́ться со счёта** иҫәп-хисапты юғалтыу **5.** өйөлөшөү, йыйылышыу, тупланыу; **спать, сби́вшись в ку́чу** бер ергә өйөлөшөп йоҡлау **6.** туҡылыу; **сли́вки сби́лись** ҡаймаҡ туҡылды **7.** *разг.* ойошоу, кейеҙләнеү, сейәлеү; **во́лосы сби́лись** сәс ойошоп кейеҙләнде ♦ **сби́ться с ног** арып аяҡтан яҙыу, арып-талып йығылыу

**СБЛИЖА́ТЬ** *несов. см.* **сбли́зить**

**СБЛИЖА́ТЬСЯ 1.** *несов. см.* **сбли́зиться 2.** *страд. от* **сближа́ть**

**СБЛИЖЕ́НИЕ** *с см.* **сбли́зить – сближа́ть, сбли́зиться – сближа́ться**; **сближе́ние у́мственного и физи́ческого труда́** аҡыл хеҙмәте менән физик хеҙмәттең яҡынайыуы

**СБЛИ́ЖЕННОСТЬ** *ж* яҡынлыҡ, яҡын булыу; **сбли́женность проводо́в** сымдарҙың яҡынлығы

**СБЛИ́ЗИТЬ** *сов.* **1.** яҡынайтыу, яҡын килтереү, яҡынлаштырыу; **сбли́зить электро́ды** электродтарҙы яҡынайтыу **2.** яҡынайтыу, дуҫлаштырыу; **о́бщая цель их сбли́зила** уртаҡ маҡсат уларҙы дуҫлаштырҙы

**СБЛИ́ЗИТЬСЯ** *сов.* **1.** яҡынайыу, яҡын килеү, яҡынлашыу; **вса́дники сбли́зились** һыбайлылар яҡынлашты **2.** (*сдружиться*) яҡынайыу, дуҫ булып (дуҫлашып) китеү, дуҫлашыу

**СБЛОКИ́РОВАТЬ** *сов.*; *спец.* берләштереп (тоташтырып) сығыу, ҡороу; **сблоки́ровать компле́кт лесо́в** баҫҡыстарҙы тоташтырып сығыу (*төҙөлөп ятҡан йорт тирәләй*)

**СБЛОКИ́РОВАТЬСЯ** *сов. см.* **блоки́роваться** I

**СБО́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое *горн.* сбой ...ы, сбойға мөнәсәбәтле; **сбо́ечная рабо́та** сбой эштәре

**СБОЙ** *м* **1.** *спец. см.* **сбить** 5–8, **сби́ться** 1, 2; **сбой пил** бысҡының үтмәҫләнеүе **2.** *спец.*, *разг.* (*перебой в движении, работе*) өҙөк, өҙөклөк, тотҡарлыҡ **3.** *спорт.* (*заминка*) юртыуҙан сабыуға күсеү; **де́лать сбой** юртыуҙан сабыуға күсеү **4.** *спец.*, *разг.* (*часть туши*) баш-тояҡ, эсҡарын; **говя́жий сбой** һыйырҙың баш-тояғы

**СБО́КУ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* ҡабырғанан, бер яҡ ситтән, эргәнән; **сбо́ку лес** бер яҡ ситтән урман **2.** *предлог с род. п.* эргәһенән, ҡабырғаһынан, бер яҡ ситенән, эргәһендә, бер яҡ ситендә; **сбо́ку стола́** өҫтәл эргәһенән; **сбо́ку от ваго́на** вагондың бер яҡ ситендә ♦ **сбо́ку припёка** кәрәкле кишер япрағы

**СБОЛТНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* әйтеп ташлау, ысҡындырыу, әйтеп һалыу; **сболтну́ть глу́пость** ахмаҡ һүҙ ысҡындырыу

**СБОР** *м* **1.** *см.* **собра́ть** 2, **собра́ться – собира́ться** 1; **сбор хло́пка** мамыҡ йыйыу; **сбор лека́рственных расте́ний** дарыу үләндәре йыйыу; **сбор на демонстра́цию** демонстрацияға йыйылыу **2.** (*то, что собрано*) йыйым, йыйылған аҡса; **валово́й сбор зерна́** ашлыҡтың тулы йыйымы; **страхово́й сбор** страховканан йыйылған аҡса **3.** сбор, йыйылыш; **ла́герный сбор** лагерь сборы **4.** *мн.* **сбо́ры** йыйыныу, әҙерләнеү; **сбо́ры к путеше́ствию** сәйәхәткә әҙерләнеү ♦ **в сбо́ре** бөтәһе лә йыйылған (күҙ алдында)

**СБО́РИЩЕ** *с*; *разг.* **1.** өйөр, төркөм, халыҡ төркөмө **2.** йыйын, йыйылыш

**СБО́РКА I** *ж см.* **собра́ть – собира́ть** 3; **сбо́рка станка́** станокты ҡороу

**СБО́РКА II** *ж см.* **сбо́рки**

**СБО́РКИ** *мн.* (*ед.* **сбо́рка** *ж*) бөрмә; **пла́тье со сбо́рками** бөрмәле күлдәк

**СБО́РНИК** *м* **1.** йыйынтыҡ; **сбо́рник стихо́в** шиғырҙар йыйынтығы **2.** *спец.* (*резервуар*) йыйғыс, туплағыс; **сбо́рник не́фти** нефть туплағыс

**СБО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йыйылыу ...ы, тупланыу ...ы; **сбо́рный пункт** йыйылыу пункты **2.** *в разн. знач.* йыйылма; **сбо́рная кома́нда** йыйылма команда; **сбо́рный дом** йыйылма йорт; **сбо́рные железобето́нные констру́кции** йыйылма тимер-бетон конструкциялар

**СБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое йыйыу ...ы, ҡороу ...ы; **сбо́рочный цех** йыйыу цехы

**СБО́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое бөрмәле; **сбо́рчатая ю́бка** бөрмәле итәк

**СБО́РЩИК** *м* и **СБО́РЩИЦА** *ж* **1.** йыйыусы; **сбо́рщица хло́пка** мамыҡ йыйыусы; **сбо́рщик взно́сов** взнос йыйыусы **2.** йыйып ҡороусы, йыйыусы, ҡороусы; **сбо́рщик мото́ров** моторҙар йыйыусы

**СБРА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **сбро́сить, сброса́ть**

**СБРА́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сбро́ситься 2.** *страд. от* **сбра́сывать**

**СБРИВА́ТЬ** *несов. см.* **сбрить**

**СБРИВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **сбрива́ть**

**СБРИТЬ** *сов. что* ҡырыу, ҡырып алыу (ташлау); **сбри́ть бо́роду** һаҡалды ҡырып ташлау

**СБРОД** *м собир.*; *разг.*, *пренебр.* йыйын этрәгәләм, юҡ-бар (теләһә ниндәй) кешеләр

**СБРОДИ́ТЬ** *сов.* әсетеү

**СБРОДИ́ТЬСЯ** *сов.* әсеп сығыу

**СБРОС** *м* **1.** *см.* **сбро́сить – сбра́сывать** 1, 5; **сброс давле́ния** баҫымды төшөрөү **2.** *гидротех.* (*отток, отвод воды*) һыу ағыҙыу; **сброс воды́ в мо́ре** һыуҙы диңгеҙгә ағыҙыу **3.** (*сооружение для слива, отвода лишней воды*) һыу ағыҙғыс; **сда́ча в эксплуата́цию но́вого сбро́са** яңы һыу ағыҙғысты файҙаланыуға тапшырыу **4.** *геол.* аҫҡа убылып төшөү, күсеү (*ер ҡатламы*)

**СБРОСА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** ташлау, ырғытыу; **сброса́ть брёвна с платфо́рмы** платформанан бүрәнәләр ырғытыу **2.** атып ебәреү, бы-



12 зак. 2.0007.06

раҡтырыу; **сброса́ть ве́щи в чемода́н** әйберҙәрҙе сумаҙанға быраҡтырыу

**СБРО́СИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ташлау, ырғытыу, төшөрөп ебәреү, йығыу, **сбро́сить снег с кры́ши** өй түбәһенән ҡар ташлау **2.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* алып ташлау, (бәреп) төшөрөү, ҡолатыу; **сбро́сить самодержа́вие** самодержавиены ҡолатыу **3.** *что*; *разг.* һыпырып алыу, алып ташлау, һалып (алып) ырғытыу; **сбро́сить с себя́ шу́бу** өҫтөңдәге тунды һалып ырғытыу **4.** *что* ҡойоу, һалыу; **берёза сбро́сила ли́стья** ҡайын япраҡтарын ҡойған **5.** *что* (*уменьшить, понизить*) кәметеү, төшөрөү; **сбро́сить ско́рость** тиҙлекте кәметеү **6.** *во что*; *разг.* ташлау, атып бәреү, быраҡтырыу (бырғытыу); **сбро́сить бума́ги в корзи́ну** ҡағыҙҙарҙы кәрзингә ташлау **7.** *что* (*в биржевых операциях — пустить в продажу сразу в большом количестве*) күпләп сығарыу; **сбро́сить а́кции** күпләп акция сығарыу **8.** *что* (*на счётах*) алып ташлау, сигереү ♦ **сбро́сить ма́ску** *см.* **ма́ска**

**СБРО́СИТЬСЯ** *сов.* **1.** һикереү, ташланыу, ырғыу **2.** *прост.* аҡса һалышыу, күмәкләп йыйыу, йыйылышып алып биреү, йыйылышыу; **сбро́ситься по сто рубле́й** йөҙәр һум аҡса һалышыу

**СБРОСНО́Й** и **СБРО́СНЫЙ,** -ая, -ое *гидротех.* **1.** ағыҙа торған, ағыҙғыс **2.** (*полученный в результате сброса*) ағып төшкән; **грунто́вые и сбросны́е во́ды** ер аҫты һәм ағып төшкән һыуҙар

**СБРОШЮРОВА́ТЬ** *сов. см.* **брошюрова́ть**

**СБРУ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое сбруй ...ы, ҡамыт-дуға ...ы; **сбру́йный сара́й** ҡамыт-дуға һарайы

**СБРУ́Я** *ж* **1.** сбруй, еп-йышыу, ҡамыт-дуға **2.** *прост.* (*орудия, снасти для какого-л. промысла*) ҡорал, ҡорамал; **пло́тничья сбру́я** балтасы ҡорамалы; **сапо́жная сбру́я** итексе ҡорамалы

**СБРЫ́ЗГИВАТЬ** *несов. см.* **сбры́знуть**

**СБРЫ́ЗГИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сбры́згивать**

**СБРЫ́ЗНУТЬ** *сов.* бөркөү, бөркөп алыу, һиптереү, һиптереп алыу, һибәләү; **сбры́знуть бельё** кергә һыу бөркөп алыу; **дождь сбры́знул зе́млю** ергә ямғыр һибәләне

**СБЫВА́ТЬ** *несов. см.* **сбыть**

**СБЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сбы́ться** **2.** *страд. от* **сбыва́ть**

**СБЫТ** *м* (тауар) һатыу; **ры́нок сбы́та** тауар һатыу баҙары

**СБЫТОВО́Й,** -ая, -ое *торг.* һатыу ...ы; **сбытовы́е организа́ции** һатыу ойошмалары

**СБЫТЬ** *сов.* **1.** (*продать*) һатыу, һатып ебәреү; **сбыть това́р** тауарҙы һатып ебәреү **2.** *разг.* (*избавиться от кого-чего-л.*) ҡотолоу, арыныу; **сбыть ко́шек** бесәйҙәрҙән ҡотолоу; **сбыть нену́жные ве́щи** кәрәкһеҙ нәмәләрҙән арыныу **3.** (*пойти на убыль*) кәмеү, кәмей төшөү, тартылыу, ҡайтыу; **вода́ в реке́ сбыла́** йылғаның һыуы ҡайтҡан; **к ве́черу жар сбыл** кискә табан эҫелек кәмей төштө

**СБЫ́ТЬСЯ** *сов.* үтәлеү, бойомға (ғәмәлгә, тормошҡа) ашыу; **наде́жды сбыли́сь** өмөттәр тормошҡа ашты

**СВА́ДЕБНЫЙ,** -ая, -ое туй ...ы; **сва́дебный пода́рок** туй бүләге; **сва́дебные обря́ды** туй йолалары

**СВА́ДЬБА** *ж* туй, туй мәжлесе; **сыгра́ть сва́дьбу** туй үткәреү ♦ **золота́я сва́дьба** *см.* **золото́й**; **сере́бряная сва́дьба** *см.* **сере́бряный**; **до сва́дьбы заживёт** туйыңа тиклем төҙәлер (*йәрәхәтләнгән кешегә ҡарата шаярып әйтелә*)

**СВА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** свай ултыртыу (ҡағыу) ...ы; **сва́йные рабо́ты** свай ҡағыу эштәре **2.** свай өҫтөнә ҡоролған (ултыртылған); **сва́йные постро́йки** свай өҫтөнә ҡоролған ҡаралтылар

**СВА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **свали́ть**

**СВА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **свали́ться** **2.** *страд. от* **сва́ливать**

**СВАЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* йығыу, ауҙарыу; **ве́тер свали́л де́рево** ел ағасты ауҙарған; **пу́ля свали́ла медве́дя** пуля айыуҙы йыҡты **2.** *перен.*, *разг.* (бәреп) төшөрөү, ҡолатыу; **свали́ть ца́рскую мона́рхию** батша монархияһын ҡолатыу **3.** *перен.*, *разг.* (*овладеть кем-л. — о сне*) йоҡо баҫыу, ауырайтыу; (*о болезни*) йығыу; **его́ свали́л сон** уны йоҡо баҫты **4.** (*сбросить что-л. грузное*) төшөрөү, ауҙарыу, бушатыу; **свали́ть мешо́к с плеч** тоҡто яурынდан төшөрөү; **свали́ть бревно́ во двор** бүрәнәләрҙе ишек алдына ауҙарыу **5.** *перен.* (*избавить себя от чего-л. обременительного*) ҡотолоу, арыныу, өҫтән (ауыр) йөк төшөү; **свали́ть с себя́ хло́поты** (һәр төрлө) мәшәҡәттәрҙән арыныу **6.** *перен.* (*переложить на кого-л. свои обязанности*) йөкмәтеү, тапшырыу, тағыу; **все дела́ свали́ли на меня́** барлыҡ эштәрҙе миңә йөкмәттеләр **7.** *спец.* (*наклонить в сторону, накренить*) кинәт бороу, янтайтыу, ҡырынайтыу **8.** япһарыу, ауҙарыу, һылтау; **свали́ть вину́ на друго́го** ғәйепте икенсе кешегә япһарыу **9.** (*небрежно бросить*) ырғытыу, ташлау, быраҡтырыу; **свали́ть ве́щи в у́гол** нәмәләрҙе мөйөшкә быраҡтырыу

**СВАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йығылыу, ҡолау, ҡолап (йығылып) төшөү (ҡалыу); **свали́ться с кры́ши** ҡыйыҡтан ҡолап төшөү; **свали́ться с ло́шади** аттан йығылып ҡалыу **2.** (*повалиться*) ауыу, ҡолау; **забо́р свали́лся** ҡойма ауған **3.** *разг.* (*серьёзно заболеть*) аяҡтан йығылыу, ауырып (ятып) китеү **4.** (*подохнуть — о скоте*) үлеү, ҡырылыу **5.** *спец.* (*наклониться в сторону*) ҡырынайыу, ҡыйшайыу, янтайыу; **самолёт пла́вно свали́лся на ле́вое крыло́** самолёт яй ғына һулға табан янтайҙы **6.** *перен.*, *разг.* төшөү; **свали́лись на меня́ забо́ты** миңә мәшәҡәттәр төштө ♦ **гора́ с плеч свали́лась** өҫтән йөк төштө

**СВА́ЛКА** *ж* **1.** *см.* **свали́ть** 1, 4, 7; **2.** сүплек, сүп-сар; **вы́вести му́сор на сва́лку** сүп-сарҙы

сүплеккә сығарып ташлау **3.** *разг.* (*беспорядочная драка*) өймәкләшеп һуғышыу, ойпалашыу, яғалашыу

**СВА́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сүплек ...ы, сүпсар ...ы **2.** ойпалашҡан, яғалашҡан

**СВАЛЯ́ТЬ** *сов. что* баҫыу; **валя́ть ва́ленки** быйма баҫыу; **сваля́ть сукно́** тула баҫыу; **сваля́ть во́йлок** кейеҙ баҫыу ♦ **сваля́ть дурака́** ахмаҡлыҡ эшләп ташлау

**СВАЛЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*об изделиях из шерсти, пуха*) баҫылыу; **сукно́ сваля́лось хорошо́** тула шыма баҫылды **2.** (*спутаться, сбиться — о волосах, шерсти*) сыуалып (сейәлеп, сеймәлеп, кейеҙләнеп) бөтөү

**СВА́НСКИЙ,** -ая, -ое сван ...ы; **сва́нский язы́к** сван теле

**СВА́НЫ** *мн.* свандар, сван халҡы (*Көнбайыш Грузияла йәшәгән тау халҡы*) // *ед.* **сван** *м* сван ир-аты; **сва́нка** *ж* сван ҡатын-ҡыҙы

**СВА́РА** *ж* талаш, талаш-тартыш, ығы-зығы, ыҙғыш; **завести́ сва́ру** ыҙғыш тыуҙырыу

**СВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **свари́ть** 2

**СВА́РИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сва́ривать**

**СВАРИ́ТЬ** *сов.* **1.** бешереү, ҡайнатыу, бешереп (ҡайнатып) алыу; **свари́ть ка́шу** бутҡа бешереп алыу; **свари́ть варе́нье** ҡайнатма ҡайнатып алыу **2.** *тех.* иретеп йәбештереү, ҡыҙҙырып йәбештереү, сваркалау (*аппарат, агрегат менән*); **свари́ть тру́бы** торбаларҙы иретеп йәбештереү ♦ **ка́ши не сва́ришь** *с кем кем менәндер* борсағың бешмәү

**СВА́РИТЬСЯ** *несов.*; *уст.* талашыу, әрепләшеү, тиргәшеү, ирешеү

**СВАРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *см.* **вари́ться** 1; **мя́со свари́лось** ит бешеп сыҡты **2.** *уст.* һеңеү, үҙләшеү (*аш тураһында*) **3.** *прост.* (*ошпариться*) бешеү, яндырып алыу, яныу (*кеше тәне*); **свари́ться кипятко́м** ҡайнар һыуға яныу

**СВА́РКА** *ж* иретеп йәбештереү, сварка (*ике тимерҙе һ.б. иретеп тоташтырыу процесы*); **га́зовая сва́рка** газ сваркаһы; **автоге́нная сва́рка** автоген менән иретеп йәбештереү; **кислоро́дная сва́рка** кислород менән иретеп йәбештереү

**СВАРЛИ́ВОСТЬ** *ж* мыжыҡлыҡ, ғауғасыллыҡ, тауыш сығарыуға әүәҫлек

**СВАРЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое мыжыҡ, ғауғасыл, тауыш сығарыусан; **сварли́вый стари́к** ғауғасыл ҡарт

**СВАРНО́Й,** -ая, -ое *тех.* сваркаланған, иретеп йәбештерелгән; **сварны́е тру́бы** иретеп йәбештерелгән торбалар

**СВА́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое иретеп йәбештереү ...ы, сварка ...ы; **сва́рочные рабо́ты** иретеп йәбештереү эштәре; **сва́рочный цех** иретеп йәбештереү цехы

**СВА́РЩИК** *м* и **СВА́РЩИЦА** *ж* иретеп йәбештереүсе; **шко́ла сва́рщиков** иретеп йәбештереүселәр мәктәбе; **рабо́тать сва́рщиком** иретеп йәбештереүсе булып эшләү

**СВА́СТИКА** *ж* свастика; **фаши́стская сва́стика** фашист свастикаһы

**СВАТ** *м* **1.** яусы, димсе **2.** ҡоҙа ♦ **ни сват ни брат**; **ни сват ни кум** атам-затым (зат-ботом) түгел; атам туғаны, инәм ҡарендәше түгел

**СВА́ТАНЬЕ** *с см.* **сва́тать**, **сва́таться**

**СВА́ТАТЬ** *несов.* **1.** *кого, кому, за кого* (ҡыҙ) димләү **2.** ҡоҙалау, яусылау, димләү, яусы (ҡоҙа) ебәреү, ҡыҙ һоратыу (әйттереү); **сва́тать дочь сосе́да** күршенең ҡыҙын яусылау **3.** *перен.*, *разг.* (*усиленно предлагать что-л.*) димләү, ҡоҙалау; **сва́тать в председа́тели** рәйеслеккә ҡоҙалау

**СВА́ТАТЬСЯ** *несов.* яусы (ҡоҙа) ебәреү, ҡыҙ әйттереү (һоратыу), ҡоҙалау, яусылау, димләү

**СВАТОВСТВО́** *с см.* **сва́тать**, **сва́таться**

**СВА́ТЬЯ** *ж* ҡоҙағый; **стать сва́тьями** ҡоҙағыйҙар булып китеү

**СВА́ХА** *ж* яусы, димсе

**СВА́Я** *ж* свай (*терәк бағана*); **заби́ть сва́ю** свай ҡағыу; **сва́и моста́** күпер свайҙары

**СВЕ́ДЕНИЕ** *с* **1.** *обычно мн.* **све́дения** мәғлүмәт, хәбәр; **получа́ть све́дения** хәбәр алып тороу; **собра́ть све́дения** мәғлүмәт йыйыу; **статисти́ческие све́дения** статистик мәғлүмәттәр **2.** (*знания в какой-л. области*) белем; **све́дения по фи́зике** физиканан белем; **агрономи́ческие све́дения** агрономия буйынса белем **3.** (*осведомлённость в чём-л.*) таныштырыу, таныш (хәбәрҙар) булыу, белдереү, хәбәр (мәғлүм) итеү, иғтибар ♦ **к ва́шему све́дению** *в знач. вводн. сл.* белгегеҙ килһә, мәғлүм булһын

**СВЕДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **свести́ — своди́ть** II 1, 4—13; **2.** (*судорожное сжатие мышц*) тартышыу; (*конечностей*) көҙән йыйырыу; **сведе́ние ноги́** аяҡты көҙән йыйырыу

**СВЕ́ДУЩИЙ,** -ая, -ее (*хорошо осведомлённый в какой-л. области*) тәрән белемле, ҙур мәғлүмәтле; **све́дущий челове́к** ҙур мәғлүмәтле кеше

**СВЕЖЕ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең “күптән түгел”, “әле яңы”, “яңы ғына” мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **свежевспа́ханный** яңы ғына һөрөлгән, **свежевы́бритый** әле яңы ҡырынған

**СВЕЖЕВА́ТЬ** *несов.* тиреһен тунап эс-ҡарынын алыу; **свежева́ть ту́шу бара́на** тәкә түшкәһен тунап эс-ҡарынын алыу

**СВЕЖЕВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **свежева́ть**

**СВЕЖЕЗАМОРО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое туңдырылған (*яңы көйө, йыйып алғас та туңдырылған*); **свежезаморо́женная сморо́дина** туңдырылған ҡарағат

**СВЕЖЕИСПЕЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** яңы бешерелгән, яңы бешкән, яңы ғына бешеп сыҡҡан; **свежеиспечённый хлеб** яңы бешкән икмәк **2.** *перен.*, *разг.* яңы, яңы ғына -ған/-гән; **свежеиспе-**

**чённая весть** яңы ғына ишетелгән хәбәр; **свежеиспечённый врач** яңы ғына эшләй башлаған табип

**СВЕЖЕНИ́НА** и **СВЕЖИНА́** *ж*; *разг.* яңы һуйылған ит

**СВЕ́ЖЕСТЬ** *ж* **1.** таҙалыҡ, сафлыҡ, һалҡынса ел, еләҫлек; **све́жесть ра́ннего у́тра** иртәнге еләҫлек; **све́жесть во́здуха** һауа сафлығы **2.** яңы ғына -ған/-гән булыуы; **све́жесть фру́ктов** емештең яңы ғына йыйылған булыуы **3.** тән һәм йән рәхәтлеге, еңеллек; **ощуща́ть прия́тную све́жесть** тәндә еңеллек һиҙеү **4.** (*цветущий, здоровый вид*) сәләмәт (һау) төҫ, һаулыҡ, сәләмәтлек, таҙалыҡ; **све́жесть лица́** йөҙҙөң сәләмәтлеге **5.** эскерһеҙлек, хәйләһеҙлек, сафлыҡ; **нра́вственная све́жесть** әхлаҡи сафлыҡ **6.** йыуылған, таҙа булыу, таҙалыҡ; **све́жесть белья́** кейемдең таҙалығы **7.** асыҡ (баҙыҡ) булыу, асыҡлыҡ, баҙыҡлыҡ, уңмағанлыҡ; **све́жесть кра́сок** буяуҙың баҙыҡ булыуы **8.** *перен.* яңылыҡ; **све́жесть мы́слей** фекер яңылығы ♦ **не пе́рвой све́жести**: 1) (*лежалый*) бик үк яңы түгел, иҫкергән; 2) (*не очень чистый*) бик үк таҙанан түгел

**СВЕЖЕ́ТЬ** *несов.* **1.** еләҫләнеү, һалҡынсаланыу, һалҡыная төшөү; **к но́чи свеже́ет** *безл.* кискә табан һалҡыная төшә **2.** (*становиться более свежим — о растениях*) төҫө асылыу, йәшәрә барыу **3.** (*приобретать свежий, здоровый вид*) йәшәреп (таҙарып, матурланып) китеү, шәбәйеү, йәшәрә (таҙара, матурлана) барыу **4.** көс-хәл инеү, еңеләйеп китеү; **свеже́ть от холо́дной воды́** һалҡын һыуҙан көс-хәл инеү **5.** *мор.* (ел) көсәйеү

**СВЕ́ЖИЙ,** -ая, -ее **1.** яңы (ғына) -ған/-гән; (*о растениях*) йәшел; **све́жее мя́со** яңы һуйылған ит; **све́жее молоко́** яңы һауған һөт; **све́жая ры́ба** яңы ғына тотолған балыҡ; **све́жая мали́на** яңы ғына йыйылған ҡурай еләге; **све́жий хлеб** яңы бешкән икмәк; **све́жее се́но** йәшел бесән **2.** (*естественный, необработанный*) -маған/-мәгән, йәш, яңы; **све́жая капу́ста** тоҙланмаған кәбеҫтә; **све́жие огурцы́** тоҙланмаған ҡыяр **3.** (*не бывший в употреблении*) тотонолмаған, кейелмәгән, керләнмәгән, таҙа; **све́жая простыня́** тотонолмаған япма; **све́жая руба́шка** кейелмәгән күлдәк **4.** (*чистый*) болғанмаған, таҙа, саф; **све́жая вода́** таҙа һыу; **све́жий во́здух** саф һауа **5.** (*восстановленный*) саф, яңы; **встать со све́жей голово́й** саф баш менән килеп тороу; **све́жая си́ла** яңы көс **6.** төҫө китмәгән, йылтырауы бөтмәгән, яҡшы һаҡланған; **све́жие кра́ски на карти́не** картинаның буяуы яҡшы һаҡланған **7.** янып торған, таҙа, сәләмәт; **све́жее лицо́** янып торған йөҙ **8.** яңы; **све́жая ра́на** яңы йәрәхәт; **све́жий след** яңы эҙ **9.** яңы, иң һуңғы; **све́жие но́вости** иң һуңғы хәбәрҙәр; **све́жие откры́тия** яңы асыштар **10.** үҙенсәлекле, оригиналь, яңы; **све́жие мы́сли** яңы фекрҙәр **11.** (*прохладный*) һалҡынса; **све́жий ве́тер** һалҡынса ел ♦ **на све́жую па́мять** хәтерҙә (иҫтә) саҡта; **на све́жую го́лову** *см.* **голова́**

**СВЕЖИ́ТЬ** *несов.* **1.** (*делать свежим, бодрым*) көс биреү, дәртләндереү, күңел күтәреү **2.** рәхәтлек (еңеллек) биреү, еңеләйтеп ебәреү; **прохла́дный во́здух свежи́т** еләҫ һауа еңеллек бирә

**СВЕЖЬЁ** *с собир.*; *рыб.* яңы тотолған балыҡ

**СВЕЗТИ́** *сов.* **1.** (*везя, спустить сверху вниз*) төшөрөү, алып төшөрөү (төшөү), түбән төшөрөү; **свезти́ с горы́** тауҙан алып төшөү **2.** *разг.* (*отвезти*) илтеү, илтеп ҡуйыу; **свезти́ бага́ж на ста́нцию** йөктө станцияға илтеп ҡуйыу **3.** (*увезти*) алып бөтөү, алып китеү; **свезти́ хлеб с по́ля** игенде яландан алып бөтөү; **свезти́ дрова́ со двора́** утынды ишек алдынан алып китеү **4.** *разг. см.* **свози́ть**

**СВЁКЛА** *ж* сөгөлдөр; **кормова́я свёкла** мал сөгөлдөрө; **са́харная свёкла** шәкәр сөгөлдөрө; **столо́вая свёкла** аш сөгөлдөрө

**СВЕКЛО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "сөгөлдөр" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **свеклоре́з** сөгөлдөр ҡырҡҡыс; **свеклоубо́рочный** сөгөлдөр йыйғыс

**СВЕКЛОВИ́ЦА** *ж* шәкәр сөгөлдөрө, сөгөлдөр

**СВЕКЛОВИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шәкәр сөгөлдөрө ...ы, сөгөлдөр ...ы; **свеклови́чные семена́** шәкәр сөгөлдөрө орлоҡтары; **свеклови́чный са́хар** сөгөлдөр шәкәре **2.** сөгөлдөр үҫтереүсе; **свеклови́чные райо́ны** сөгөлдөр үҫтереүсе райондар

**СВЕКЛОВИ́ЩЕ** *с* сөгөлдөр баҫыуы

**СВЕКЛОВО́Д** *м* сөгөлдөрсө (*сөгөлдөр үҫтереүсе, сөгөлдөр үҫтереүсе белгес*); **брига́да свеклово́дов** сөгөлдөрсөләр бригадаһы

**СВЕКЛОВО́ДСТВО** *с* сөгөлдөрсөлөк (*сөгөлдөр үҫтереү эше*); **занима́ться свеклово́дством** сөгөлдөрсөлөк менән шөғөлләнеү

**СВЕКЛОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сөгөлдөр үҫтереү ...ы; **свеклово́дческий совхо́з** сөгөлдөр үҫтереү совхозы

**СВЕКЛОКОПА́ТЕЛЬ** *м* сөгөлдөр ҡаҙғыс (*машина*)

**СВЕКЛОСА́ХАРНЫЙ,** -ая, -ое сөгөлдөр эшкәртеү ...ы, шәкәр сөгөлдөрө ...ы; **свеклоса́харный заво́д** сөгөлдөр эшкәртеү заводы

**СВЕКЛОСЕ́ЯНИЕ** *с* сөгөлдөр сәсеү; **райо́ны свеклосе́яния** сөгөлдөр сәсеүсе райондар

**СВЕКЛОУБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое сөгөлдөр (ҡаҙып) алыу ...ы, сөгөлдөр йыйғыс, сөгөлдөр йыйып алыу ...ы; **свеклоубо́рочный комба́йн** сөгөлдөр йыйғыс комбайн; **свеклоубо́рочный сезо́н** сөгөлдөр ҡаҙып алыу мәле

**СВЕКО́ЛЬНИК** *м* **1.** (*свекольная ботва*) сөгөлдөр һабағы (япрағы) **2.** (*суп*) сөгөлдөр ашы

**СВЕКО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сөгөлдөр ...ы; **свеко́льная ботва́** сөгөлдөр һабағы (япрағы); **свеко́льный суп** сөгөлдөр ашы **2.** (*лиловато-красный*) алһыу, ал ҡыҙыл; **свеко́льный цвет** алһыу төҫ

**СВЁКОР** *м* (*отец мужа*) ҡайны; **свекро́вь** *ж* (*мать мужа*) ҡәйнә, бейем

**СВЕЛИКОДУ́ШНИЧАТЬ** *сов.* хуш күңеллелек (миһырбанлыҡ, шәфҡәтлелек) күрһәтеү

**СВЕРГА́ТЬ** *несов. см.* **све́ргнуть**

**СВЕРГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *несов. см.* **све́ргнуться 2.** (*низвергаться*) өҫтән (юғарынан) шарлап төшөү (*һыу ағымы*) **3.** *страд. от* **сверга́ть**

**СВЕ́РГНУТЬ** *сов.* (бәреп) төшөрөү, ҡолатыу; **све́ргнуть ца́рское прави́тельство** батша хөкүмәтен бәреп төшөрөү

**СВЕ́РГНУТЬСЯ** *сов.*; *уст.* төшөп китеү, йығылыу, төшөрөлөү

**СВЕРЖЕ́НИЕ** *с см.* **све́ргнуть — сверга́ть**; **сверже́ние самодержа́вия** самодержавиены ҡолатыу

**СВЕ́РИТЬ** *сов. что* сағыштырыу, сағыштырып сығыу (ҡарау), дөрөҫлөгөн тикшереү; **све́рить часы́** сәғәттең дөрөҫлөгөн тикшереү; **све́рить ру́копись с по́длинником** ҡулъяҙманы төп нөсхә менән сағыштырып сығыу

**СВЕ́РИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* сағыштырылыу, сағыштырып ҡарау, дөрөҫлөгөн тикшереү, тикшереп биреү, белешмә алыу; **све́риться со словарём** һүҙлек буйынса дөрөҫлөгөн тикшереү

**СВЕ́РКА** *ж см.* **све́рить — сверя́ть, све́риться — сверя́ться**; **све́рка спи́ска избира́телей** һайлаусылар исемлегенең дөрөҫлөгөн тикшереү

**СВЕРКА́НИЕ** *с* балҡыу, йымылдау, йылтылдау, йылтырау, ялтырау, ем-ем (йым-йым, йылт-йылт) итеү; **сверка́ние звёзд** йондоҙҙарҙың ем-ем итеүе; **сверка́ние мо́лнии** йәшен йылтылдауы

**СВЕРКА́ТЬ** *несов.* **1.** балҡыу, йымылдау, йылтылдау, ем-ем (йым-йым) итеү; **в не́бе сверка́ют звёзды** күктә йондоҙҙар ем-ем итә **2.** (*ярко вспыхивать*) йылтырау, йылт-йылт (ялт-йолт) килеү, ялтлау, ялтырау; **сверка́ют штыки́** штыктар ялт-йолт килә; **мо́лнии сверка́ют** йәшен ялтлай **3.** *чем* и *без доп.* (*ярко блестеть при сильном возбуждении — о глазах*) яныу, янып китеү, ялтырау **4.** (*резко выделяться ярким цветом*) сағылйып күренеү, баҙлау; **мак сверка́ет в траве́** үлән араһынан мәк сағылйып күренә ♦ **то́лько пя́тки сверка́ют** табан ялтыратыу

**СВЕРКА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **сверка́ть 2.** *прил.* ҡояшлы, салт аяҙ; **сверка́ющий весе́нний день** салт аяҙ яҙғы көн **3.** *прил.* сағыу, балҡып торған, күҙҙе сағылдырырлыҡ; **сверка́ющая красота́** сағыу матурлыҡ

**СВЕРКНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **сверка́ть**; **сверкну́ла мо́лния** йәшен балҡыны **2.** *перен.* (*неожиданно появиться в сознании*) келт итеп (иҫкә) килеп төшөү ♦ **сверкну́ть глаза́ми** уҫал ҡараш ташлау

**СВЕРЛИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое быраулау ...ы; **сверли́льный стано́к** быраулау станогы; **сверли́льные рабо́ты** быраулау эштәре

**СВЕРЛИ́ЛЬЩИК** *м см.* **сверло́вщик**

**СВЕРЛИ́ТЬ** *несов. что* **1.** быраулау, быраулап тишеү; **сверли́ть желе́зо** тимерҙе быраулап тишеү; **сверли́ть сква́жины** скажиналар быраулау **2.** соҡоп (тишеп) инеү; **жук сверли́т древеси́ну** ҡуңыҙ үҙағасты тишеп инә **3.** соҡоп (тишеп) таҙартыу; **сверли́ть больно́й зуб** ауыртҡан теште соҡоп таҙартыу **4.** *перен.* тишерҙәй итеп текләү (текәлеү); **его́ глаза́ сверля́т меня́** уның күҙҙәре миңә тишерҙәй итеп текәлде **5.** *обычно безл.*; *перен.* үҙәккә үтеп ауыртыу (һыҙлау), сәнсеү; **в у́хе сверли́т** ҡолаҡ сәнсә

**СВЕРЛИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **сверли́ть** 1—3

**СВЕРЛО́** *с* бырау; **стально́е сверло́** ҡорос бырау

**СВЕРЛО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* быраулау ...ы; **сверло́вочный агрега́т** быраулау агрегаты

**СВЕРЛО́ВЩИК** *м* быраулаусы; **брига́да сверло́вщиков** быраулаусылар бригадаһы

**СВЕРЛЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **сверли́ть 2.** *прил.* (*острый, пронизывающий — о боли*) үҙәккә үтерлек ауыртҡан (һыҙлаған); **сверля́щая зубна́я боль** тештәрҙең үҙәккә үтерлек һыҙлауы **3.** *прил.* (*резкий, пронзительный — о звуках*) ҡолаҡ ярғыс

**СВЕРНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** төрөү, төрөп ҡуйыу, түңәрәкләп (йомро итеп) төрөү, урау; **сверну́ть ковёр** келәмде төрөп ҡуйыу **2.** урап яһау, төрөү; **сверну́ть сига́ру** сигара төрөү **3.** (*уменьшить, сократить*) кәметеү, ҡыҫҡартыу, аҙайтыу, тарайта (кәметә, ҡыҫа) төшөү; **сверну́ть те́мпы строи́тельства** төҙөлөш темптарын кәметеү; **сверну́ть фронт** фронтты тарайта төшөү **4.** *разг.* (*повернуть в сторону*) бороу, боролоу; **сверну́ть маши́ну к вокза́лу** машинаны вокзалға бороу **5.** (*перевести на другую тему*) икенсе яҡҡа йүнәлтеү, бороу; **сверну́ть разгово́р на другу́ю те́му** һүҙҙе икенсе темаға бороу **6.** икенсе тарафҡа йүнәлтеү, бороу; **сверну́ть го́лову напра́во** башты уңға бороу **7.** *разг.* быуынды сығарыу, тайҙырыу, ҡаймыҡтырыу; **сверну́ть но́гу** аяҡ быуынын сығарыу **8.** *перен.*, *прост.* (*в короткий срок лишить жизненных сил — о болезни*) бөгөү, ҡаҡшатыу, һындырыу **9.** (*снять, вращая по нарезке*) бороп алыу; **сверну́ть ла́мпочку с патро́на** лампочканы патрондан бороп алыу ♦ **сверну́ть го́лову (ше́ю)**: 1) муйынын бороп (ҡайырып) үлтереү (*малға, ҡош-ҡортҡа ҡарата*); 2) (*употребляется как угроза убить кого-л.*) харап итеү, дөмөктөрөү

**СВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*скататься трубкой*) төрөлөү, түңәрәкләнеп төрөлөү, ураныу, бөгәрләнеү; **у́гол газе́ты сверну́лся** гәзит(тең) мөйөшө бөгәрләнгән **2.** (*загнувшись с краёв, закрыться*) кибеп ҡорошоу, ҡурылыу, бөрөшөп ҡалыу (*үҫемлектәргә ҡарата*); **ли́стья черёмухи сверну́лись** муйыл япраҡтары бөрөшкән **3.** йомарланып (бөгәрләнеп) ятыу; **ко́шка сверну́лась клубко́м** бесәй бөгәрләнеп ятҡан **4.** (*превратиться в сгусток — о крови*) ойошоу; (*о молоке*) эреү **5.** *перен.* ҡыҫыла (тарая, кәмей) төшөү; **фронт сверну́лся** фронт тарая төштө **6.** *перен.* ваҡытлыса

туҡталыу (туҡтатылыу), туҡталып тороу, һүнеү; **строи́тельство моста́ сверну́лось** күпер төҙөү ваҡытлыса туҡтатылды **7.** күсеү (*фекергә, һүҙгә ҡарата*); **разгово́р сверну́лся на воспита́ние дете́й** һүҙ балалар тәрбиәләүгә күсте **8.** (*сдвинуться в сторону от удара, толчка*) салшайыу, ҡалтайыу, ҡыйшайыу

**СВЕРСТА́ТЬ** *сов. что*; *полигр.* наборҙы биткә (вёрсткаға) һалыу, вёрсткалау; **сверста́ть газе́ту** гәзитте вёрсткаға һалыу

**СВЕ́РСТНИК** *м* и **СВЕ́РСТНИЦА** *ж* йәштәш, ҡорҙаш; **быть све́рстниками** йәштәштәр булыу

**СВЁРСТЫВАТЬ** *несов. см.* **сверста́ть**

**СВЁРСТЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **свёрстывать**

**СВЁРТОК** *м* **1.** (*предмет, свёрнутый трубкой*) урама, төргәк; **свёрток нот** ноталар төргәге **2.** (*пакет*) төргәк, төйөнсөк; **завяза́ть свёрток** төргәкте бәйләү

**СВЁРТЫВАЕМОСТЬ** *ж* ойоу (ойошоу) һәләте, ойошоусанлыҡ ♦ **свёртываемость кро́ви** ҡандың ойошоусанлығы

**СВЁРТЫВАНИЕ** *с см.* **свёртывать**, **свёртываться**; **свёртывание ли́стьев** япраҡтарҙың ҡурылыуы; **свёртывание кро́ви** ҡандың ойошоусанлығы; **свёртывание рабо́т** эштең туҡталып тороуы

**СВЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **сверну́ть**

**СВЁРТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сверну́ться** **2.** *страд. от* **свёртывать**

**СВЕРХ** *предлог с род. п.* **1.** (*при указании на предмет, поверх которого, на котором размещается кто-что-л.*) өҫтөнән, өҫтөнә, өҫтөндә; **наде́ть сверх руба́шки** күлдәк өҫтөнән кейеү

**2.** (*при указании на предмет, поверх, выше которого направлено действие*) өҫтөнән; **смотре́ть сверх очко́в** күҙлек өҫтөнән ҡарау

**3.** (*при указании на превышение какой-л. меры, нормы*) -дан/-дән тыш, -дан/-дән артыҡ; **сверх пла́на** пландан тыш; **сверх шта́та** штаттан тыш; **служи́ть сверх сро́ка** ваҡытынан артыҡ хеҙмәт итеү

**4.** (*кроме, помимо чего-л.*) өҫтөнә, -дан/-дән тыш, -дан/-дән башҡа; **сверх за́работной пла́ты** хеҙмәт хаҡынан тыш

**5.** (*вопреки чему-л.*) -ға/-гә ҡарамаҫтан, -ған/-гән ерҙән, -да/-дә; **сверх ожида́ния** көтмәгәндә

**СВЕРХ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "үтә", "бик", "ныҡ", "ғәйәт", "ғәҙәттән тыш", "-дан/-дән тыш" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **сверхшта́тный** штаттан тыш; **сверхо́пытный** үтә тәжрибәле

**СВЕРХГИГА́НТ** *м* **1.** ғәҙәттән тыш, (ғәйәт) ҙур (*күбеһенсә өҫтәлмәлек булып йөрөй*); **самосва́лы-сверхгига́нты** ғәйәт ҙур самосвалдар **2.** *астр.* сверхгигант (*яҡтылығы һәм күләме Ҡояшҡа ҡарағанда мең тапҡыр артыҡ булған ғәйәт ҙур йондоҙ*)

**СВЕРХДА́ЛЬНИЙ,** -яя, -ее **1.** бик алыҫ (йыраҡ), ғәҙәттәгенән алыҫ (йыраҡ) араға; **сверхда́льняя диста́нция** бик алыҫ дистанция **2.** *см.* **сверхдальнобо́йный**

**СВЕРХДАЛЬНОБО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое бик ныҡ алыҫҡа (йыраҡҡа) ата торған; **сверхдальнобо́йное ору́дие** бик ныҡ алыҫҡа ата торған орудие

**СВЕРХЗВУКОВО́Й,** -ая, -ое тауыштан шәберәк; **сверхзвуково́й самолёт** тауыштан шәберәк осоусы самолёт

**СВЕРХЛИМИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое лимиттан тыш; **сверхлими́тное потребле́ние электроэне́ргии** электр энергияһын лимиттан тыш ҡулланыу

**СВЕРХПЛА́НОВЫЙ,** -ая, -ое пландан тыш, пландан артыҡ (етештерелгән); **сверхпла́новое зада́ние** пландан тыш эш; **сверхпла́новая проду́кция** пландан артыҡ (етештерелгән) продукция

**СВЕРХПРИ́БЫЛЬ** *ж*; *эк.* өҫтәмә табыш (килем); **получи́ть сверхпри́быль** өҫтәмә табыш алыу

**СВЕРХРА́ННИЙ,** -яя, -ее бик иртә; **сверхра́нний сев** бик иртә сәсеү

**СВЕРХСРО́ЧНИК** *м*; *разг. см.* **сверхсрочнослу́жащий**

**СВЕРХСРОЧНОСЛУ́ЖАЩИЙ** *м* сроктан тыш (үҙ ирке менән) хәрби хеҙмәт итеүсе

**СВЕРХСРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сроктан тыш, үҙ ирке менән; **сверхсро́чная вое́нная слу́жба** сроктан тыш хәрби хеҙмәт **2.** *разг.* бик (үтә) ашығыс; **сверхсро́чное зада́ние** бик ашығыс эш

**СВЕ́РХУ** *нареч.* **1.** өҫтән, юғарынан; **вода́ па́дает све́рху** һыу юғарынан төшә **2.** (*со стороны руководящих органов власти*) юғарынан; **директи́вы све́рху** юғарынан килгән директивалар **3.** (*по поверхности чего-л.*) өҫтән, тыштан; **изба́ све́рху обши́та тёсом** өй тыштан йоҡа таҡта менән көпләнгән **4.** (*с верховья реки*) йылға үренән, үрҙән; **све́рху идёт ка́тер** йылға үренән катер килә ♦ **све́рху вниз смотре́ть** юғарынан (тиңһенмәй) ҡарау; **све́рху до́низу** өҫтән аҫҡа тиклем, баштан-аяҡ, тулыһынса

**СВЕРХУРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** эш сәғәтенән тыш эшләнгән (башҡарылған); **сверхуро́чное зада́ние** эш сәғәтенән тыш башҡарылған эш **2.** *в знач. сущ.* **сверхуро́чные** *мн.* эш сәғәтенән тыш эшләгәнгә түләү (*аҡса*)

**СВЕРХЧЕЛОВЕ́К** *м* ғәййәр (илаһи) кеше, тәбиғәттән өҫтөн зат

**СВЕРХЧЕЛОВЕ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое кеше көсө етмәҫлек, кеше ҡулынан килмәҫлек; **сверхчелове́ческая борьба́** кеше көсө етмәҫлек көрәш

**СВЕРХШТА́ТНЫЙ,** -ая, -ое штаттан тыш (булған); **сверхшта́тная до́лжность** штаттан тыш вазифа

**СВЕРХЪЕСТЕ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** мөғжизәле, илаһи (*тәбиғи булмаған*); **сверхъесте́ственная си́ла** илаһи көс **2.** *перен.*, *разг.* ғәҙәттән тыш, ғәжәп, иҫ киткес; **сверхъесте́ственные спосо́бности** иҫ киткес һәләт

**СВЕРЧО́К** *м* өй сиңерткәһе; **стрекота́ние сверчка́** өй сиңерткәһе сөрөлдәүе

**СВЕРША́ТЬ** *несов. см.* **сверши́ть**

**СВЕРША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сверши́ться** **2.** *страд. от* **сверша́ть**

**СВЕРШЕ́НИЕ** *с*; *высок. см.* **сверши́ть** — **сверша́ть**, **сверши́ться** — **сверша́ться**; **сверше́ние по́двига** батырлыҡ күрһәтеү

**СВЕРШИ́ТЬ** *сов.*; *высок. см.* **соверши́ть**

**СВЕРШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *высок. см.* **соверши́ться**

**СВЕ́РЩИК** *м* и **СВЕ́РЩИЦА** *ж* сағыштырыусы, сағыштырып төҙәтеүсе

**СВЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **све́рить**

**СВЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **све́риться** **2.** *страд. от* **сверя́ть**

**СВЕ́СИТЬ I** *сов.* **1.** һалындырыу, һалбыратыу, һәлберәтеү, аҫылындырыу; **све́сить но́ги** аяҡтарҙы һалындырыу **2.** (*склонить*) аҫҡа (түбән) эйеү (төшөрөү); **све́сить го́лову** башты түбән эйеү

**СВЕ́СИТЬ II** *сов.*; *разг.* (*взвесить*) үлсәү, үлсәп алыу; **све́сить килогра́мм хле́ба** бер килограмм икмәк үлсәп алыу

**СВЕ́СИТЬСЯ I** *сов.* **1.** (*повиснуть*) һалыныу, һалынып төшөү (тороу), һалбырау, һалбырап төшөү (тороу), аҫылыныу, аҫылынып тороу; **ве́тки све́сились до земли́** ботаҡтар ергә тиклем һалынып төшкән **2.** (*склониться*) эйелеү, аҫҡа (түбән) эйелеү (бөгөлөү), аҫҡа (түбән) һалыныу; **и́ва све́силась над реко́й** йылға өҫтөнә тал һалынып тора

**СВЕ́СИТЬСЯ II** *сов.*; *прост.* (*взвеситься*) үлсәнеү

**СВЕСТИ́** *сов.* **1.** етәкләп төшөрөү; **свести́ ло́шадь в во́ду** атты һыуға етәкләп төшөрөү; **свести́ ребёнка по ле́стнице** баланы баҫҡыстан етәкләп төшөрөү **2.** илтеү, илтеп ҡуйыу (ташлау); **свести́ дете́й в де́тский сад** балаларҙы балалар баҡсаһына илтеп ҡуйыу **3.** *разг. см.* **своди́ть**; **свести́ дете́й в цирк** балаларҙы циркка алып барыу **4.** *на кого-что* (*дать иное направление*) бороу, бороп ебәреү; **свести́ разгово́р на другу́ю те́му** һүҙҙе икенсегә бороу **5.** (*увести на другое место*) бороу; **свести́ ло́шадь с доро́ги** атты юлдан бороу **6.** *прост.* йәшерен (урлап) алып китеү; **свести́ коро́ву со двора́** ишек алдынан һыйырҙы урлап алып китеү **7.** юҡ итеү, бөтөрөү (*һипкел, тап, сөйәлгә ҡарата*); **свести́ пятно́ с пла́тья** күлдәктәге тапты бөтөрөү; **свести́ весну́шки с лица́** биттәге һипкелде бөтөрөү **8.** *во что* (*соединить вместе*) йыйыу, туплау, ҡушыу, төркөмләү; **свести́ отря́ды в полк** отрядтарҙы полкка ҡушыу **9.** *разг.* ҡауыштырыу, осраштырыу, күрештереү; **свести́ с подру́гой** әхирәт менән осраштырыу **10.** (*сблизить*) тоташтырыу, тура килтереү, йыйырыу, яҡынлаштырыу; **свести́ бро́ви** ҡаш йыйырыу; **свести́ мост** күперҙе тоташтырыу **11.** *что обычно безл.* көҙән йыйырыу, тартышыу; **свело́ но́гу** аяҡты көҙән йыйырҙы **12.** *разг.* (*перевести*) төшөрөү, күсереү; **свести́ рису́нок на папиро́сную бума́гу** һүрәтте папирос ҡағыҙына күсереү **13.** *к чему, до чего, на что* ҡалдырыу, ҡыҫҡартыу; **свести́ расхо́ды к ми́нимуму** сығымдарҙы иң аҙға ҡалдырыу ♦ **свести́ в моги́лу** *см.* **моги́ла**; **свести́ концы́ с конца́ми** *см.* **коне́ц**; **свести́ на нет** юҡҡа сығарыу, юҡ булыу; **свести́ с ума** *см.* **ум**; **свести́ счёты**: 1) иҫәп-хисапты өҙөү, иҫәпләшеү; 2) үс алыу, үс ҡайтарыу

**СВЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** *к чему, на что* (ҡайтып) ҡалыу; **расхо́ды свели́сь к ми́нимуму** сығымдар минимумға ҡалды **2.** (*ограничиться чем-л.*) ҡайтып ҡалыу, сикләнеү; **всё свело́сь к разгово́ру** бөтәһе лә һөйләшеүгә ҡайтып ҡалды **3.** (*исчезнуть с поверхности чего-л.*) юҡ булыу, бөтөү; **жи́рное пятно́ свело́сь** май табы бөттө

**СВЕТ I** *м* **1.** яҡтылыҡ, яҡты, нур; **со́лнечный свет** ҡояш яҡтыһы; **свет луны́** ай яҡтыһы; **дневно́й свет** көндөҙгө яҡтылыҡ, көн яҡтыһы; **электри́ческий свет** электр яҡтыһы; **ско́рость све́та** яҡтылыҡ тиҙлеге; **свет свечи́** май шәм яҡтыһы **2.** *разг.* (*рассвет*) таң, таң атыу; **ещё три часа́ до све́та** таң атыуға өс сәғәт бар **3.** (*источник освещения*) ут; **зажéчь в ко́мнате свет** бүлмәлә ут тоҡандырыу **4.** *перен.* сатҡы, нур; **свет сча́стья** бәхет нуры; **свет наде́жды** өмөт сатҡыһы ♦ **свет оче́й** күҙ нуры; **в све́те** *чего нимәлер* күҙлегенән сығып; **ни свет ни заря́** бик иртә, ҡара таңдан, таң тишегенән; **проли́ть свет** асыҡлау, асыҡлыҡ индереү, төшөндөрөп биреү; **све́ту (све́та) невзви́деть** *см.* **невзви́деть**

**СВЕТ II** *м* **1.** (*вселенная*) донъя, ер йөҙө, йыһан; **стра́ны све́та** донъя илдәре; **путеше́ствие вокру́г све́та** донъя тирәләй сәйәхәт **2.** *уст.* (*общество*) барлыҡ кешеләр, халыҡ **3.** (*высшее общество*) йәмғиәттең (иң) алдынғы вәкилдәре (кешеләре), элита ♦ **бе́лый свет** яҡты донъя; **на край све́та** ҡош та осоп етмәҫ ергә, ер сигенә, йәһәннәм тишегенә; **тот свет** теге донъя; **ни за что на све́те** һис бер ваҡытта ла, бер ҡасан да, һис тә, бер нисек тә; **отпра́вить на тот свет** *см.* **отпра́вить**; **отпра́виться на тот свет** *см.* **отпра́виться**; **яви́ться (появи́ться) на свет**: 1) донъяға килеү (тыуыу); 2) донъяға сығыу, донъя күреү (*баҫылып сығыу — китап һ.б.*); **на свет не гляде́л бы** *см.* **гляде́ть**; **на чём свет стои́т (руга́ть)** эттән алып этҡә һалыу, эт тиреһен битенә ҡаплау; **свет (не) кли́ном сошёлся** *см.* **клин**; **сжить со́ света** көн күрһәтмәү, яҡты донъянан ебәреү, башына етеү, ҡәбергә индереү

**СВЕТА́ТЬ** *несов. безл.* таң атыу, яҡтыра башлау, яҡтырыу

**СВЕТЕ́Ц** *м* сыра ҡыҫтырғыс

**СВЕ́ТИК** *м* (*обычно со словом "мой" или именем собственным*) күҙ нурым

**СВЕТИ́ЛО** *с* **1.** яҡтыртҡыс; **со́лнце — дневно́е свети́ло** ҡояш — көндөҙгө яҡтыртҡыс **2.** *чего, какое* атаҡлы (данлыҡлы) кеше; **свети́ло**

**музыка́льного ми́ра** музыка донъяһындағы данлыҡлы кеше

**СВЕТИ́ЛЬНИК** *м* **1.** ҙур лампа, яҡтыртҡыс; **свети́льники для люминесце́нтных ламп** люминесцент лампа яҡтыртҡыстары **2.** *уст.* ҡәндил, шәмдәл

**СВЕТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое яҡтылыҡ бирә торған, яҡтыртҡыс ♦ **свети́льный газ** яҡтылыҡ бирә торған газ

**СВЕТИ́МОСТЬ** *ж*; *астр.* яҡтыртылыш

**СВЕТИ́ТЬ** *несов.* **1.** яҡтылыҡ биреү (таратыу), яҡтыртыу; **со́лнце све́тит** ҡояш яҡтырта; **свеча́ све́тит** май шәм яҡтырта **2.** яҡтыны йүнәлтеү, яҡтыртып тороу; **свети́ть фонарём** фонарь менән яҡтыртып тороу **3.** *перен.* балҡып тороу; **лицо́ её све́тит от ра́дости** йөҙө шатлыҡтан балҡып тора

**СВЕТИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** яҡтылыҡ һибеү, яҡтырыу, балҡыу; **в окна́х свети́лись огоньки́** тәҙрәләрҙә уттар балҡый ине **2.** (*блестеть, отражая свет*) йылтырап тороу, йылтырап күренеү **3.** *перен.* янып (балҡып) тороу (*йөҙгә, күҙгә ҡарата*); **лицо́ её свети́лось ра́достью** йөҙөндә шатлыҡ балҡып тора ине

**СВЕТЛЕ́ЙШИЙ** *м* бөйөк әфәнде, ғали йәнәптәре (*батша Рәсәйендә синфи айырмаһы булған юғары дәрәжә кешеләрен ололау һүҙе*)

**СВЕТЛЕ́ТЬ** *несов.* **1.** асыла (яҡтыра) төшөү (башлау); **светле́ют небеса́** күк йөҙө асыла башланы **2.** *безл.* (*о наступлении рассвета*) яҡтырыу, яҡтыра башлау **3.** *перен.* янып (балҡып) китеү, яҡтырыу, асылыу (*йөҙгә ҡарата*); **лицо́ ребёнка все бо́льше светле́ло** сабыйҙың йөҙө яҡтырғандан-яҡтыра барҙы **4.** ағарып (ялтырап) күренеү; **серп луны́ светле́ет на не́бе** күктә ай урағы ялтырап күренә

**СВЕТЛО́ 1.** *нареч.* яҡты; **ла́мпа гори́т светло́** шәм яҡты яна **2.** *в знач. сказ., безл.* яҡты; **на у́лице светло́** урамда яҡты **3.** *в знач. сказ., безл.*; *перен.* (*о радостном, ясном настроении*) хуш, рәхәт; **на душе́ светло́** күңелгә рәхәт

**СВЕТЛО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "аҡ", "аҡһыл" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **светлоко́жий** аҡ тәнле

**СВЕ́ТЛО-...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "асыҡ төҫлө", "төп төҫкә ҡарағанда ҡайтышыраҡ", "әҙерәк" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **све́тло-зелёный** асыҡ йәшел; **све́тло-жёлтый** аҡһыл һары

**СВЕТЛОБОРО́ДЫЙ,** -ая, -ое аҡ (ерән) һаҡаллы; **светлоборо́дый стари́к** аҡ һаҡаллы ҡарт

**СВЕТЛОВОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое аҡ (һары) сәсле; **светловоло́сая де́вочка** һары сәсле ҡыҙыҡай

**СВЕТЛОГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое асыҡ йәшел (зәңгәр, һоро) күҙле, шағыр (сәгер) күҙле; **светлогла́зый ма́льчик** асыҡ зәңгәр күҙле малай

**СВЕТЛОЛИ́ЦЫЙ,** -ая, -ое аҡ йөҙлө; **светлоли́цая же́нщина** аҡ йөҙлө ҡатын

**СВЕ́ТЛОСТЬ** *ж* **1.** яҡтылыҡ, баҙыҡлыҡ, тоноҡлоҡ **2.** (*титулование*) бөйөк әфәнде, ғали йәнәптәре (*батша Рәсәйендә император, кенәз ғаиләләре ағзаларына ололап өндәшеү һүҙе*)

**СВЕ́ТЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** яҡты (көслө) янған, яҡты; **све́тлая ла́мпочка** яҡты лампочка **2.** ҡояш (ай, ут яҡтыһы) төшкән, яҡты; **све́тлая ко́мната** ҡояш төшкән бүлмә; **све́тлая ночь** яҡты төн **3.** балҡып (янып) торған, сағыу, баҙыҡ, яҡты; **све́тлая звезда́** баҙыҡ йондоҙ; **све́тлый луч** балҡып торған нур **4.** асыҡ төҫлө, аҡһыл; **све́тлое пальто́** асыҡ төҫлө пальто **5.** һары, ерән (*сәс-һаҡалға ҡарата*); **све́тлые во́лосы** һары сәс **6.** йәшел, зәңгәр, һоро (*күҙгә ҡарата*); **све́тлые глаза́** зәңгәр күҙҙәр **7.** (*чистый, прозрачный — о жидкости*) үтә күренмәле, тоноҡ; **све́тлый ручеёк** тоноҡ шишмә **8.** *перен.* бәхетле, ҡыуаныслы, яҡты; **све́тлое бу́дущее** бәхетле киләсәк; **све́тлые воспомина́ния** яҡты хәтирәләр **9.** *перен.* ихлас, асыҡ; **све́тлое лицо́** асыҡ сырай **10.** *перен.* яҡты, саф, изге; **све́тлое пожела́ние** яҡты теләк; **све́тлая мечта́** изге хыял **11.** *перен.* саф күңелле (рухлы), рухы (күңеле) матур, намыҫлы; **све́тлый челове́к** саф күңелле кеше **12.** *перен.* айыҡ; **све́тлая голова́** айыҡ баш (аҡыл) ♦ **све́тлый шрифт** *типогр.* йоҡа шрифт, нәҙек хәреф; **све́тлая па́мять геро́ям** батырҙарҙың яҡты иҫтәлеге

**СВЕТЛЯ́К** *м* баҙлауыҡ

**СВЕТЛЯЧО́К** *м*; *уменьш.-ласк. от* **светля́к**

**СВЕТО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "яҡты", "яҡтылыҡ" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **светоизмери́тельный** яҡтылыҡ үлсәй торған; **светосигна́л** яҡтылыҡ сигналы

**СВЕТОБОЯ́ЗНЬ** *ж*; *мед.* күҙ сағылыу, кеселәү (*күҙҙең яҡтылыҡтан ауыртыуы*)

**СВЕТОВО́Й,** -ая, -ое яҡты ...ы, яҡтылыҡ ...ы; **световы́е во́лны** яҡтылыҡ тулҡындары; **светово́й сигна́л** яҡтылыҡ сигналы ♦ **светово́й год** *астр.* яҡтылыҡ йылы (*яҡтылыҡ нурының бер йыл эсендә үткән юл оҙонлоғо*); **светово́й день** яҡты көн (*тәүлектең ҡояш сыҡҡандан алып байығанға тиклем булған өлөшө*)

**СВЕТОЗАЩИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое яҡтылыҡтан һаҡлай торған; **светозащи́тные очки́** яҡтылыҡтан һаҡлай торған күҙлек

**СВЕТОКОПИРОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое светокопия яһай торған; **светокопирова́льная те́хника** светокопия яһай торған техника

**СВЕТОКО́ПИЯ** *ж*; *спец.* светокопия (*һыҙманың яҡтылыҡҡа һиҙгер ҡағыҙға төшөрөлгән күсермәһе*)

**СВЕТОЛЕЧЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое нур (яҡтылыҡ) менән дауалау ...ы; **светолече́бный кабине́т** яҡтылыҡ менән дауалау кабинеты

**СВЕТОЛЕЧЕ́НИЕ** *с* нур (яҡтылыҡ) менән дауалау

**СВЕТОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *бот.* яҡтылыҡ яратыусы; **светолюби́вые расте́ния** яҡтылыҡ яратыусы үҫемлектәр

**СВЕТОМАСКИРО́ВКА** *ж* яҡтылыҡты ҡаплау (ышыҡлау)

**СВЕТОМАСКИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое яҡтылыҡты ҡаплау ...ы; **светомаскиро́вочные што́ры** яҡтылыҡты ҡаплау ҡормалары

**СВЕТОНЕПРОНИЦА́ЕМОСТЬ** *ж* яҡтылыҡ үткәрмәүсәнлек

**СВЕТОНЕПРОНИЦА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое яҡтылыҡ үткәрмәй торған, яҡтылыҡ үткәрмәүсән; **светонепроница́емая бума́га** яҡтылыҡ үткәрмәй торған ҡағыҙ

**СВЕТОПРЕСТАВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *рел.* ҡиәмәт көнө, ахыр заман **2.** *перен.*, *разг.* (*необычайная суматоха*) буталыш, сыуалыш, ығы-зығы

**СВЕТОПРОНИЦА́ЕМОСТЬ** *ж* яҡтылыҡ үткәреүсәнлек

**СВЕТОПРОНИЦА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое яҡтылыҡ үткәрә торған, яҡтылыҡ үткәреүсән; **светопроница́емая бума́га** яҡтылыҡ үткәреүсән ҡағыҙ

**СВЕТОСИГНА́Л** *м* яҡтылыҡ сигналы

**СВЕТОСИГНАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* яҡтылыҡ сигнализацияһы

**СВЕТОСИ́ЛА** *ж*; *спец.* **1.** (*степень освещённости*) яҡтылыҡ көсө, яҡтыртыу дәрәжәһе **2.** (*один из показателей качества объектива*) яҡтыртыу (яҡтылыҡ үткәреү) һәләте

**СВЕТОСТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое яҡтылыҡҡа уңмай (бирешмәй) торған, уңмай (төҫөн юғалтмай) торған; **светосто́йкие кра́ски** яҡтылыҡҡа бирешмәй торған буяуҙар

**СВЕТОСТО́ЙКОСТЬ** *ж* яҡтылыҡҡа уңмау (бирешмәү)

**СВЕТОТЕНЕВО́Й,** -ая, -ое *иск.* (*выполненный с применением светотени*) төрлө асыҡлыҡтағы төҫтәр, яҡтылыҡ һәм күләгәләр (яҡты-ҡараңғы төҫтәр) ярҙамында башҡарылған; **светотенево́й рису́нок** яҡты-ҡараңғы төҫтәр ярҙамында башҡарылған һүрәт

**СВЕТОТЕ́НЬ** *ж*; *иск.* төрлө асыҡлыҡтағы төҫтәр, яҡтылыҡ һәм күләгәләр (*рәсем сәнғәтендә ҡулланыла*)

**СВЕТОТЕ́ХНИК** *м* яҡтылыҡ техникаһы белгесе

**СВЕТОТЕ́ХНИКА** *ж* яҡтылыҡ техникаһы

**СВЕТОТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое яҡтылыҡ техникаһы ...ы; **светотехни́ческая лаборато́рия** яҡтылыҡ техникаһы лабораторияһы

**СВЕТОФИ́ЛЬТР** *м*; *спец.* яҡтылыҡ фильтры, яҡтылыҡ һөҙгөс (*оптик ҡорамал*)

**СВЕТОФО́Р** *м* светофор; **фона́рь светофо́ра** светофор фонары

**СВЕТОФО́РНЫЙ,** -ая, -ое светофор ...ы; **светофо́рная сигнализа́ция** светофор сигнализацияһы

**СВЕТОЧУВСТВИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* яҡты (яҡтылыҡ) һиҙеүсәнлек, яҡтыға (яҡтылыҡҡа) һиҙгерлек

**СВЕТОЧУВСТВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое яҡтыға (яҡтылыҡҡа) һиҙгер, яҡты (яҡтылыҡ) һиҙеүсе (һиҙә торған); **светочувстви́тельная пласти́нка** яҡтылыҡҡа һиҙгер пластинка; **светочувстви́тельные не́рвы** яҡтылыҡ һиҙеүсе нервылар

**СВЕ́ТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** ғали заттар ...ы, аҡһөйәктәр ...ы; **све́тское о́бщество** аҡһөйәктәр йәмғиәте **2.** ғали заттарға (аҡһөйәктәргә) хас; **све́тские мане́ры** аҡһөйәктәргә хас ҡылыҡтар **3.** (*мирской, гражданский*) донъяуи, дини булмаған; **све́тское образова́ние** донъяуи белем

**СВЕЧА́** *ж* **1.** шәм, май шәм; **стеари́новая свеча́** стеарин шәм; **восковая́ свеча́** балауыҙ шәм **2.** *мед.* шәм (*ireп тәнгә һеңә торған дарыу*) **3.** *тех.* свеча, ут тоҡандырғыс **4.** *уст.* свеча (*яҡтылыҡ үлсәү берәмеге*) **5.** (*вертикальный подъём*) бейеккә (юғарыға) теп-текә күтәрелеү; **самолёт сде́лал свечу́** самолёт бейеккә теп-текә күтәрелде ♦ **игра́ не сто́ит свеч** үҙ-үҙен аҡламай

**СВЕЧЕ́НИЕ** *с* яҡтырып күренеү; **свече́ние мо́ря** диңгеҙҙең яҡтырып күренеүе

**СВЕЧЕРЕ́ТЬ** *сов.* кисләү, кис булыу; **совсе́м свечере́ло** *безл.* бөтөнләй кисләне; **день свечере́л** көн кисләне

**СВЕЧНО́Й,** -ая, -ое шәм ...ы; **свечно́й ога́рок** шәм ҡалдығы; **свечна́я подста́вка** шәм аҫты

**СВЕ́ШАТЬ** *сов.*; *разг. см.* **све́сить** II

**СВЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **све́сить** I

**СВЕ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **све́ситься** 1; **2.** *страд. от* **све́шивать**

**СВЕ́ЯТЬ** *сов. что* елгәреү

**СВИВА́ЛЬНИК** *м* биләүес; **заверну́ть ребёнка в свива́льник** баланы биләүес менән биләү

**СВИВА́ТЬ** *несов. см.* **свить**

**СВИДА́НИЕ** *с* күрешеү, осрашыу; **делово́е свида́ние** эшлекле осрашыу; **день свида́ния с больны́ми** ауырыуҙар менән күрешеү көнө; **идти́ на свида́ние** осрашыуға барыу ♦ **до свида́ния** һау булығыҙ, хушығыҙ

**СВИДЕ́ТЕЛЬ** *м* и **СВИДЕ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* шаһит; **быть свиде́телем** *чего-л. нимәнеңдер* шаһиты булыу; **допро́с свиде́телей** шаһиттарҙан һорау алыу; **вскрыть завеща́ние при свиде́телях** васыятнамәне шаһиттар алдында асыу

**СВИДЕ́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое шаһит ...ы; **свиде́тельские показа́ния** шаһит күрһәтеүҙәре

**СВИДЕ́ТЕЛЬСТВО** *с* **1.** (*сообщение о чём-л.*) күрһәтеү; **свиде́тельство очеви́дцев** шаһиттарҙың күрһәтеүе **2.** (*то, что подтверждает, удостоверяет какое-л. событие*) раҫлаусы факт, дәлил; **истори́ческие свиде́тельства** тарихи дәлилдәр **3.** (*официальный документ, удостоверяющий что-л.*) таныҡлыҡ; **свиде́тельство о рожде́нии** тыуыу тураһында таныҡлыҡ; **а́вторское свиде́тельство** авторлыҡ таныҡлығы

**СВИДЕ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** *что*, *о чём* (*удостоверять в качестве свидетеля*) раҫлау, иҫбатлау, күрһәтеү; **свиде́тельствовать о**

**происше́ствии** булған хәлде иҫбатлау **2.** *что, о чём* (*подтверждать, доказывать*) раҫлау, дөрөҫләү, күрһәтеп тороу **3.** *что* (*официально удостоверять подлинность чего-л.*) рәсми рәүештә нығытыу (раҫлау); **свиде́тельствовать по́дпись** имзаны рәсми рәүештә раҫлау **4.** *кого-что*; *уст.* (*осматривать с целью определения чего-л.*) ҡарау, тикшереү, ҡарап тикшереү; **свиде́тельствовать больны́х** ауырыуҙарҙы ҡарап тикшереү

**СВИ́ДЕТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күрешеү, осрашыу

**СВИЛЕВА́ТЫЙ,** -ая, -ое *спец.* боролоп үҫкән, борош; **свилева́тая берёза** борош ҡайын

**СВИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **свильну́ть**

**СВИЛЬ** *ж*; *спец.* **1.** борош ҡатлам (*ағасҡа, ағасҡа ҡарата*) **2.** тулҡын ҡатлам (*быялаға, керамикаға ҡарата*)

**СВИЛЬНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* икенсе яҡҡа һыпыртыу

**СВИНА́РНИК** *м* **1.** сусҡа аҙбары (һарайы) **2.** *разг., неодобр.* бысраҡ (бола) өй (бүлмә)

**СВИНА́РЬ** *м* и **СВИНА́РКА** *ж* сусҡа ҡараусы

**СВИНЕ́Ц** *м* **1.** ҡурғаш (*химик элемент, металл*); **добы́ча свинца́** ҡурғаш сығарыу (табыу); **сплав свинца́ с сурьмо́й** ҡурғаш менән һөрмә иретмәһе **2.** *перен.* пуля, ҡурғаш; **встре́тить врага́ свинцо́м** дошманды пуля менән ҡаршы алыу ♦ **голова́ (ру́ки, но́ги и т.п.) как (сло́вно, то́чно) свинцо́м налита́ (на́литы)** баш тубалдай булды; **лечь свинцо́м на се́рдце** йөрәккә ауыр таш (ҡурғаш) булып ятыу

**СВИНИ́НА** *ж* сусҡа ите; **жа́реная свини́на** ҡыҙҙырылған сусҡа ите

**СВИ́НКА I** *ж*; *уменьш.-ласк. от* **свинья́** 1 ♦ **морска́я сви́нка** диңгеҙ сусҡаһы

**СВИ́НКА II** *ж* ҡабаҡҡолаҡ, ҡолаҡбау, свинка (*ҡолаҡ арты биҙе шешеүенән ғибәрәт булған йоғошло балалар ауырыуы*)

**СВИНОВО́Д** *м* сусҡасылыҡ белгесе, сусҡа үрсетеү белгесе

**СВИНОВО́ДСТВО** *с* сусҡа үрсетеү, сусҡасылыҡ; **занима́ться свиново́дством** сусҡасылыҡ менән шөғөлләнеү

**СВИНОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сусҡа үрсетеү ...ы, сусҡасылыҡ ...ы; **свиново́дческое хозя́йство** сусҡасылыҡ хужалығы

**СВИНО́Й,** -ая, -ое сусҡа ...ы; **свино́е са́ло** сусҡа майы; **свины́е котле́ты** сусҡа котлеты; **свина́я ко́жа** сусҡа күне

**СВИНОМА́ТКА** *ж* инә сусҡа

**СВИНОПА́С** *м* сусҡа көтөүсеһе

**СВИНОСОВХО́З** *м* (*свиноводческий совхоз*) сусҡасылыҡ совхозы

**СВИНОФЕ́РМА** *ж* (*свиноводческая ферма*) сусҡасылыҡ фермаһы

**СВИ́НСКИЙ,** -ая, -ое *разг., презр.* **1.** (*грязный, неряшливый*) бысраҡ, һәпрә, шаҡшы **2.** (*низкий, подлый*) ҡәбәхәт, әшәке; **сви́нский посту́пок** әшәке ҡылыҡ

**СВИ́НСТВО** *с*; *разг.* **1.** (*неряшливость*) бысраҡлыҡ, һәпрәлек, шаҡшылыҡ **2.** (*подлость*) ҡәбәхәтлек, этлек, әшәкелек; **сде́лать сви́нство** этлек эшләү

**СВИНТИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*скрепить винтом*) винт (шөрөп) менән беркетеү **2.** *разг.* (*снять*) бороп сығарыу (алыу); **свинти́ть га́йку** шөрөптө бороп сығарыу **3.** *разг.* (*испортить резьбу*) һырҙы бөтөрөү, һырҙы ашау (*шөрөпкә ҡарата*)

**СВИНТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ашалыу (*шөрөптөң һырҙарына ҡарата*); **резьба́ свинти́лась** шөрөп һырҙары ашалған

**СВИНУ́ХА** и **СВИНУ́ШКА** *ж* сусҡа бәшмәге

**СВИНЦЕВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* ҡурғашлау, ҡурғаш ялатыу; **свинцева́ть швы** йөйҙө ҡурғашлау

**СВИНЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡурғаш ...ы, ҡурғашлы; **свинцо́вая пыль** ҡурғаш туҙаны; **свинцо́вая руда́** ҡурғашлы мәғдән **2.** ҡурғаштан яһалған; **свинцо́вая пу́ля** ҡурғаштан яһалған пуля **3.** (*тёмно-серый*) ҡарағусҡыл; **свинцо́вые ту́чи** ҡарағусҡыл ҡуйы болоттар **4.** *перен.* (*тяжёлый, гнетущий*) ауыр, ғазаплы; **свинцо́вая тоска́** ауыр һағыш

**СВИНЧА́ТКА** *ж*; *разг.* **1.** (*игральная бабка*) ҡурғаштан ҡойолған йәкәл **2.** (*грузило*) ҡурғаштан ҡойолған батырғыс **3.** ҡурғаш киҫәге (*һуғышҡанда усҡа ҡуя торған*)

**СВИ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **свинти́ть**

**СВИ́НЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *несов. см.* **свинти́ться 2.** *страд. от* **сви́нчивать**

**СВИНЬЯ́** *ж* **1.** сусҡа; **поро́дистая свинья́** тоҡомло сусҡа **2.** *перен., разг.* (*неряха*) өҫ-башы бысраҡ кеше, сусҡа **3.** *перен., разг.* ҡәбәхәт (әшәке) кеше, сусҡа ♦ **подложи́ть свинью́** этлек (ҡәбәхәтлек) эшләү, аяҡ салыу; **мета́ть би́сер пе́ред сви́ньями** *см.* **би́сер**

**СВИРЕ́ЛЬ** *ж*; *муз.* һыбыҙғы; **игра́ть на свире́ли** һыбыҙғыла уйнау

**СВИРЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һыбыҙғы ...ы; **свире́льный звук** һыбыҙғы тауышы

**СВИРЕ́ЛЬЩИК** *м* һыбыҙғысы; **выступле́ние свире́льщиков** һыбыҙғысылар сығышы

**СВИРЕПЕ́ТЬ** *несов.* ажарланыу, ҡотороноу; **медве́дь свирепе́л** айыу ажарланды; **бу́ря свирепе́ла** дауыл ҡоторондо

**СВИРЕ́ПО** *нареч.* ажарланып, ҡоторонop; **ве́тер дул свире́по** ел ҡоторонop өрҙө

**СВИРЕ́ПОСТЬ** *ж* **1.** йыртҡыслыҡ; **свире́пость льва** арыҫландың йыртҡыслығы **2.** ҡоторонҡо (ярһыулы, ҡурҡыныс) булыу, шашыу; **свире́пость бу́ри** дауылдың ҡоторонҡо булыуы **3.** рәхимһеҙлек, мәрхәмәтһеҙлек, шәфҡәтһеҙлек, ҡанһыҙлыҡ; **свире́пость палача́** йәлләдтең ҡанһыҙлығы

**СВИРЕ́ПСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** йыртҡыслыҡ (рәхимһеҙлек, яуызлыҡ, уҫаллыҡ) күрһәтеү **2.** ярһыу, шашыу, ҡотороноу; **мо́ре свире́пствовало** диңгеҙ ҡоторондо

**СВИРЕ́ПЫЙ,** -ая, -ое **1.** йыртҡыс, ажар(лы); **свире́пый зверь** йыртҡыс йәнлек **2.** ныҡ көслө, ҡурҡыныс, ҡотороноҡо (*тәбиғәт күренештәренә ҡарата*); **свире́пый ве́тер** ныҡ көслө ел **3.** (ныҡ) йонсоткос, көслө; **свире́пый ка́шель** йонсотҡос йүтәл **4.** рәхимһеҙ, мәрхәмәтһеҙ, шәфҡәтһеҙ, ҡанһыҙ, ажар(лы); **свире́пый враг** ҡанһыҙ дошман

**СВИРИСТЕ́ЛЬ** *м* мышар турғайы

**СВИРИСТЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* серелдәү

**СВИСА́ТЬ** *несов.* **1.** асылынып (һалынып) тороу; **усы́ свиса́ют** мыйыҡтары һалынып тора **2.** һалынып төшөү (тороу), һалынҡы булыу; **ю́бка свиса́ет** юбка һалынып тора

**СВИ́СНУТЬ** *сов. см.* **свиса́ть**

**СВИСТ** *м* **1.** һыҙғырған тауыш, һыҙғырыу тауышы; **пронзи́тельный свист** эсе итеп һыҙғырған тауыш **2.** ғыжылдаған (ғыж-ғыж иткән) тауыш, ғыжылдауыҡ (*тын юлына ҡарата*); **дыша́ть со сви́стом** ғыжылдап тын алыу **3.** ыжғырған (һыҙғырған) тауыш (*елгә ҡарата*); **свист ве́тра** ел һыҙғырған тауыш **4.** зыйлаған (зый-зый иткән) тауыш, зыйылдау; **свист пуль** пулялар зыйылдауы

**СВИСТА́ТЬ** *несов. см.* **свисте́ть**

**СВИСТЕ́ТЬ** *несов.* **1.** һыҙғырыу; **свисте́ть сквозь зу́бы** теш араһынан һыҙғырыу; **ве́тер свисти́т** ел һыҙғыра; **парово́з свисти́т** паровоз һыҙғыра **2.** *чем* ғыжылдау, ғыж-ғыж иткән тауыш сығарыу; **свисте́ть гру́дью** күкрәге ғыжылдап тороу **3.** зый-зый итеү, зыйлау; **круго́м свистя́т пу́ли** тирә-яҡта пулялар зыйлай ♦ **ве́тер свисти́т в карма́не** кесәлә елдәр уйнай, кесәлә һуҡыр бер тин дә юҡ

**СВИ́СТНУТЬ** *сов.* **1.** *кого*; *прост.* сыптырыу, һыҙырыу, тондороу, ҡайыҙлау, ҡундырыу; **он сви́стнул ло́шадь кнуто́м** ул атты сыбыртҡы менән һыҙырып ебәрҙе **2.** *что*; *прост.* урлап алып китеү, сәлдереү; **у меня́ сви́стнули кни́гу** минең китапты сәлдерҙеләр ♦ **когда́ рак (на горе́) сви́стнет** *см.* **рак**

**СВИСТО́К** *м* **1.** һыҙғыртҡыс, һыбыҙғы; **милице́йский свисто́к** милиция һыбыҙғыһы **2.** (*свист*) һыҙғырған тауыш, һыҙғырыу; **дать свисто́к** һыбыҙғы һыҙғыртыу

**СВИСТОПЛЯ́СКА** *ж* и **СВИСТОПЛЯ́С** *м*; *разг.* **1.** ҡотороноу, шашыныу **2.** (*полная неразбериха*) буталсыҡлыҡ, тәртипһеҙлек

**СВИСТУ́ЛЬКА** *ж*; *разг.* һыҙғыртҡыс, балалар һыбыҙғыһы

**СВИСТУ́Н** *м*; *разг.* **1.** (*любитель свистеть*) һыҙғырырға әүәҫ кеше **2.** *перен.* маҡтансыҡ кеше, буш ҡыуыҡ

**СВИСТЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **свисте́ть** **2.** *прил.* ғыжылдаған, һыҙғырған, ғыжылдауыҡлы, һыҙғырыулы; **свистя́щий ка́шель** ғыжылдауыҡлы йүтәл ♦ **свистя́щие согла́сные** *лингв.* һыҙғырыулы тартынҡылар

**СВИ́ТА** *ж* **1.** ярандар (*дәрәжәһе ҙур кешене оҙатып йөрөгән кешеләр төркөмө*); **ца́рская сви́та** батша ярандары **2.** *геол.* свита (*бер заманда һәм бер шартта ялалған тау тоҡомдары ҡатламы*); **известняко́вая сви́та** эзбизташ свитаһы; **углено́сная сви́та** күмер свитаһы

**СВИ́ТЕР** *м* свитер; **шерстяно́й сви́тер** йөн свитер

**СВИ́ТОК** *м* төргәк; **сви́ток бума́ги** ҡағыҙ төргәге

**СВИТЬ** *сов. что* **1.** үреү, ишеү; **свить верёвку** бау ишеү **2.** (*свернуть трубкой*) ҡулса яһау, төргәкләү, төрөү, бөгөү, бөгәрләү, уралтыу; **свить перга́мент в сви́ток** пергаментты төргәкләү ♦ **свить (себе́) гнездо́** *см.* **гнездо́**

**СВИ́ТЬСЯ** *сов.* бөгәрләнеү, йомарланыу, уралып ятыу; **змея́ свила́сь в кольцо́** йылан ҡулса һымаҡ йомарланған

**СВИХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *разг. см.* **вы́вихнуть**; **свихну́ть ру́ку** ҡулды тайҙырыу **2.** *кого*; *перен.*, *разг.* холҡон насарайтыу (боҙоу); **свихну́ть ребёнка** баланың холҡон боҙоу **3.** *прост. см.* **свихну́ться** 2 ♦ **свихну́ть (себе́) ше́ю** һәләкәткә (уңышһыҙлыҡҡа) осрау, насарлыҡҡа юлығыу; **свихну́ть с ума́** аҡылдан яҙыу, аҡылын юйыу

**СВИХНУ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** аҡылдан яҙыу, йүләрләнеү, тиләләнеү; **свихну́ться от тоски́** һағыштан тиләләнеү **2.** тайпылыу, аҙыу; **свихну́ться с пра́вильного пути́** дөрөҫ юлдан тайпылыу ♦ **свихну́ться с ума́** *см.* **свихну́ться** 1

**СВИЩ** *м* **1.** (*изъян в виде отверстия*) тишек, ярыҡ; **свищ в древеси́не** үҙағастағы тишек **2.** (*скрытая пустота в металле*) ҡыуыш, ҡыуышлыҡ **3.** (*фистула*) бөтәү яра; **кише́чный свищ** эсәктәге бөтәү яра

**СВИЩЕВА́ТЫЙ,** -ая, -ое (*со свищами*) тишекле, ярыҡ; **свищева́тый оре́х** ярыҡ сәтләүек

**СВИЯ́ЗЬ** *ж* хохоҡ (*өйрәктәр ғаиләһенә ингән һунар ҡошо*)

**СВОБО́ДА** *ж* **1.** *в разн. знач.* азатлыҡ, иреклек, бойондороҡһоҙлоҡ, хөрриәт, ирек; **свобо́да ли́чности** шәхес ирке; **свобо́да печа́ти** матбуғат ирке; **борьба́ за свобо́ду** бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәш; **завоева́ть свобо́ду** хөрмәт яулау; **получи́ть свобо́ду** азатлыҡ алыу **2.** (*простор*) иркен ер, сәхрә, ирек; **вы́пустить скоти́ну на свобо́ду** малды сәхрәгә сығарыу **3.** *разг.* (*досуг*) уңайлы мәл (ваҡыт), буш ваҡыт, ял ♦ **демократи́ческие свобо́ды** демократик ирекләктәр (*шәхескә ҡарата*); **свобо́да море́й** диңгеҙҙәр сикһеҙлеге (*карапмарға асыҡ диңгеҙҙәрҙә йөрөү өсөн сик ҡуймау*); **свобо́да со́вести** *см.* **со́весть**

**СВОБО́ДНО** **1.** *нареч.* азат, ирекле рәүештә, хөр **2.** *нареч.* иркен; **чу́вствовать себя́ свобо́дно на сце́не** үҙеңде сәхнәлә иркен тотоу **3.** *нареч.* (*без затруднения*) еңел, анһат, иркен; **чита́ть свобо́дно по-ара́бски** ғәрәпсә еңел уҡыу **4.** *в знач. сказ.*, *безл.* киң, мул, иркен; **в ко́мнате свобо́дно** бүлмәлә иркен **5.** *в знач. сказ.*, *безл.* (*о наличии свободного времени*) буш, иркен **6.** *в знач.*

*сказ.*, *безл.* иркен, еңел, хөр; **мне легко́ и свобо́дно** миңә еңел һәм хөр

**СВОБО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** азат, ирекле, бәйһеҙ, хөр; **свобо́дный челове́к** ирекле кеше **2.** (*совершаемый легко, без затруднений*) еңел, тулы мөмкинлекле, киң, иркен; **свобо́дное дыха́ние** иркен һулыш; **свобо́дное обще́ние** иркен аралашыу **3.** (*не заполненный, не занятый кем-чем-л.*) эйәһеҙ, эйәһе булмаған, буш; **свобо́дное купе́** буш купе; **свобо́дный стул** буш ултырғыс **4.** *разг.* буш торған, файҙаланылмаған; **свобо́дный телефо́н** буш торған телефон **5.** (*просторный*) киң, иркен; **свобо́дная ко́мната** иркен бүлмә **6.** (*не тесный, не облегающий плотно*) мул үлсәмле, күләме ҙур, иркен, киң, мул; **свобо́дное пла́тье** мул күлдәк; **свобо́дная о́бувь** иркен аяҡ кейеме **7.** *күсм.* ирекле; **свобо́дные вы́боры** ирекле һайлауҙар; **свобо́дная торго́вля** ирекле сауҙа ♦ **свобо́дное паде́ние те́ла** *физ.* есемдәрҙең тотҡарлыҡһыҙ төшөүе (*есемдәрҙең ауырлыҡ көсө тәьҫирендәге хәрәкәте*); **свобо́дный пробе́г** *физ.* тотҡарлыҡһыҙ арауыҡ юл (*матдәләге молекулаларҙың бер бәрелештән икенсе бәрелешкә тиклем хәрәкәте*); **свобо́дная профе́ссия** ирекле профессия; **свобо́дный уда́р** *спорт.* ирекле тибеү (*ҡапҡаға ҡаршылыҡһыҙ тибеү*); **свобо́дный перево́д** ирекле тәржемә

**СВОБОДОЛЮ́БЕЦ** *м* ирек (азатлыҡ) һөйөүсән кеше

**СВОБОДОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое ирек (азатлыҡ) һөйөүсән, ирек (азатлыҡ) яҡлаған, хөр; **свободолюби́вый наро́д** азатлыҡ һөйөүсән халыҡ; **свободолюби́вые мы́сли** хөр фекерҙәр; **свободолюби́вые стихи́** азатлыҡ һөйөүсән шиғырҙар

**СВОБОДОЛЮ́БИЕ** *с* ирек (азатлыҡ) һөйөү, ирек (азатлыҡ) һөйөүсәнлек

**СВОБОДОМЫ́СЛИЕ** *с* хөр фекерлелек

**СВОБОДОМЫ́СЛЯЩИЙ,** -ая, -ее хөр фекерле, киң ҡарашлы; **свободомы́слящий поэ́т** хөр фекерле шағир

**СВОД** *м* **1.** *см.* **свести́** 1, 5–8, 10 — **своди́ть** II; **2.** йыйылма, йыйынтыҡ; **свод зако́нов** закондар (ҡанундар) йыйынтығы **3.** *архит.* көмбәҙ; **ка́менный свод** таш көмбәҙ; **сво́ды моста́** күпер көмбәҙе **4.** *перен.* (*небесный купол, небо*) күк көмбәҙе

**СВОДИ́ТЬ I** *сов. кого-что* алып барыу, алып барып ҡайтыу; **своди́ть дете́й в кино́** балаларҙы киноға алып барыу

**СВОДИ́ТЬ II** *несов. см.* **свести́** ♦ **не своди́ть глаз** күҙ алмай ҡарау; **едва́ (е́ле, ко́е-как) своди́ть концы́ с конца́ми** (аҡсаны һ.б.) тартып-һуҙып ҡына еткереү, осон-осҡа саҡ-саҡ ялғау

**СВОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **свести́сь** **2.** *страд. от* **своди́ть** II

**СВО́ДКА** *ж* **1.** *см.* **свести́** 8, 10, 12 — **своди́ть** II; **2.** мәғлүмәт; **сво́дка пого́ды** һауа торошо тураһында мәғлүмәт; **сво́дка о хо́де се́ва** сәсеү барышы хаҡында мәғлүмәт

**СВО́ДНИК** *м* и **СВО́ДНИЦА** *ж* димсе, йәрәштереүсе, ҡауыштырыусы (кеше)

**СВО́ДНИЧАТЬ** *несов.* димләү, йәрәштереү, ҡауыштырыу (*ир-егет менән ҡатын-ҡыҙҙы*)

**СВО́ДНИЧЕСТВО** *с* димселек

**СВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йыйылма; **сво́дный орке́стр** йыйылма оркестр; **сво́дный батальо́н** йыйылма батальон **2.** (*ғаиләләге бер-береһенә туған булмаған балаларға ҡарата*)

**СВО́ДЧАТЫЙ,** -ая, -ое көмбәҙ, көмбәҙле; **сво́дчатый потоло́к** көмбәҙле түшәм

**СВОЕВО́ЛИЕ** *с* башбаштаҡлыҡ, үҙбелдеклелек, үҙенсә эш итеү; **показа́ть своево́лие** башбаштаҡлыҡ күрһәтеү

**СВОЕВО́ЛЬНИК** *м* и **СВОЕВО́ЛЬНИЦА** *ж*; *разг.* башбаштаҡ кеше

**СВОЕВО́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* башбаштаҡланыу, башбаштаҡлыҡ күрһәтеү, үҙ белдеге менән эш итеү

**СВОЕВО́ЛЬНОСТЬ** *ж* башбаштаҡлыҡ, үҙбелдеклелек

**СВОЕВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** башбаштаҡ (*үҙ белдеге менән эшләргә яратыусан*); **своево́льный ма́льчик** башбаштаҡ малай **2.** үҙенсә (үҙ белдеге менән) эшләнгән; **своево́льный посту́пок** үҙ белдеге менән эшләнгән ҡылыҡ

**СВОЕВРЕ́МЕННО** *нареч.* (үҙ) ваҡытында, бик ваҡытлы; **своевре́менно предупреди́ть об опа́сности** хәүеф-хәтәр тураһында үҙ ваҡытында иҫкәртеү

**СВОЕВРЕ́МЕННОСТЬ** *ж* үҙ ваҡытында (бик ваҡытлы) булыу; **своевре́менность лече́ния** дауалауҙың бик ваҡытлы булыуы

**СВОЕВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое үҙ ваҡытында булған (күрһәтелгән һ.б.), бик ваҡытлы; **своевре́менная по́мощь** үҙ ваҡытында күрһәтелгән ярҙам

**СВОЕКОРЫ́СТИЕ** *с* ҡомһоҙлоҡ, ҡомарлыҡ (*үҙ файҙаһын ғына ҡайғыртыу*)

**СВОЕКОРЫ́СТНОСТЬ** *ж см.* **своекоры́стие**

**СВОЕКОРЫ́СТНЫЙ,** -ая, -ое ҡомһоҙ, туймаҫ, ҡомар; **своекоры́стный челове́к** ҡомһоҙ кеше

**СВОЕНРА́ВИЕ** *с* үҙ һүҙле булыу, үҙһүҙлелек, тиҫкәрелек, холоҡһоҙлоҡ; **показа́ть своенра́вие** үҙһүҙлелек күрһәтеү

**СВОЕНРА́ВНОСТЬ** *ж* үҙһүҙлелек, тиҫкәрелек, холоҡһоҙлоҡ; **своенра́вность хара́ктера** холоҡтоң тиҫкәрелеге

**СВОЕНРА́ВНЫЙ,** -ая, -ое үҙенә бер төрлө, үҙ һүҙле, кире; **своенра́вный ма́льчик** үҙ һүҙле малай

**СВОЕОБРА́ЗИЕ** *с* үҙенә бер төрлөлөк, үҙенсәлек, үҙсәнлек; **своеобра́зие истори́ческой обстано́вки** тарихи хәлдең үҙенсәлеге; **своеобра́зие языка́** тел үҙенсәлеге

**СВОЕОБРА́ЗНОСТЬ** *ж см.* **своеобра́зие**; **своеобра́зность хара́ктера** холоҡ үҙсәнлеге

**СВОЕОБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое үҙенә генә хас сифатлы, үҙенә бер төрлө, үҙенсәлекле; **своеобра́зное тво́рчество** үҙенә бер төрлө ижад; **своеобра́зная речь** үҙенсәлекле телмәр

**СВОЁ** *с мест. см.* **свой**

**СВОЗ** *м см.* **свезти́** 1, 3 — **свози́ть** II; **своз хле́ба с поле́й** игенде баҫыуҙан ташыу

**СВОЗИ́ТЬ I** *сов. кого-что*; *разг.* алып барып ҡайтыу (*машинаға, атҡа ултыртып*); **свози́ть в дере́вню** ауылға алып барып ҡайтыу

**СВОЗИ́ТЬ II** *несов. см.* **свезти́** 1

**СВОИ́** *мн. мест. см.* **свой**

**СВОЙ** *м* (своя *ж*, своё *с*) *мест.* **1.** (*принадлежащий себе*) үҙ; **сде́лать свои́ми рука́ми** үҙ ҡулдарың менән эшләү; **не ве́рить свои́м глаза́м** үҙ күҙҙәреңә ышанмау **2.** (*являющийся личной собственностью*) үҙ, шәхси; **у меня́ своя́ маши́на** минең үҙ машинам; **у них свой дом** уларҙың үҙ йорттары **3.** (*своеобразный*) үҙ, үҙеңдең, үҙенә генә хас; **име́ть свой за́пах** үҙенә генә хас еҫе булыу; **име́ть свой ме́тод рабо́ты** үҙеңдең эш алымың булыу **4.** *в знач. сущ.* **своё** *с* үҙемдеке (үҙеңдеке, үҙенеке); **доби́ться своего́** үҙенекен итеү **5.** (*родственный, близкий*) ят (сит) түгел, үҙ; **свои́ лю́ди** үҙ кешеләр ♦ **сам не свой**; **сама́ не своя́** күңелгә толҡа тапмау, болоҡһоу, тынысһыҙ булыу; **быть в своём уме́** башында аҡылы булыу; **в своё вре́мя** *см.* **вре́мя**; **в своём ро́де** *см.* **род**; **идти́ свое́й доро́гой** үҙ белдегенсә эш итеү, үҙ юлың менән китеү; **на свои́х (на) двои́х** үҙ аяҡтарың менән, йәйәүләп (йөрөү); **настоя́ть на своём** үҙенекен эшләү; **не свои́м го́лосом** йәмһеҙ итеп (аҡырыу); **рассказа́ть свои́ми слова́ми** үҙ һүҙҙәрең менән һөйләп биреү; **сказа́ть своё сло́во** берәй эштә үҙеңде күрһәтеү, үҙ һүҙеңде әйтеү; **своя́ рука́ влады́ка** үҙе баш, үҙе түш; **умере́ть свое́й сме́ртью** үҙ үлемең (әжәлең) менән үлеү

**СВО́ЙСТВЕННИК** *м* ҡоҙа; **сво́йственница** *ж* ҡоҙағый, ҡоҙаса

**СВО́ЙСТВЕННОСТЬ** *ж*; *книжн.* хас сифат (һыҙат), үҙенсәлек

**СВО́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое хас, хас булған; **сво́йственная ему́ скро́мность** уға хас баҫалҡылыҡ

**СВО́ЙСТВО** *с* үҙенсәлек, (хас) сифат (һыҙат); **сво́йство хара́ктера** холоҡ һыҙаты; **хими́ческие сво́йства воды́** һыуҙың химик үҙенсәлектәре; **целе́бные сво́йства мёда** балдың шифалы үҙенсәлектәре

**СВОЙСТВО́** *с* ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ

**СВОЛА́КИВАТЬ** *несов. кого-что* **1.** *см.* **своло́чь, сволочи́ть 2.** *с.-х.* тарттырыу (*бесән, һалам*)

**СВОЛА́КИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **свола́кивать**

**СВОЛОЧИ́ТЬ** *сов.*; *прост. см.* **своло́чь**

**СВОЛОЧНО́Й,** -ая, -ое *груб., прост.* (*подлый, скверный*) әшәке, ҡәбәхәт

**СВО́ЛОЧЬ** *ж*; *груб., прост.* **1.** әшәке, ҡәбәхәт **2.** *собир.* (*подлые люди*) әҙәм аҡтыҡтары, ҡәбәхәттәр, әшәке кешеләр

**СВОЛО́ЧЬ** *сов. кого-что* **1.** *разг.* һөйрәп (тартып) төшөрөү; **своло́чь мешо́к с теле́ги** тokто арбанан һөйрәп төшөрөү **2.** (*волоча, снести в одно место*) һөйрәп килтереп өйөү; **своло́чь все брёвна к забо́ру** бүрәнәләрҙе ҡойма буйына һөйрәп килтереп өйөү

**СВО́РА** *ж* **1.** *охот.* сылбыр, бау; **спусти́ть соба́ку со сво́ры** этте сылбырҙан ысҡындырыу **2.** *собир.* (*стая*) өйөр, көтөү (*этҡә, бүрегә ҡарата*) **3.** *кого, какая*; *перен., презр.* (*шайка, банда*) өйөр; **сво́ра престу́пников** енәйәтселәр өйөрө

**СВОРА́ЧИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **свороти́ть** 5; **2.** *см.* **сверну́ть** 1—3, 9

**СВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сверну́ться** 1—6; **2.** *страд. от* **свора́чивать**

**СВО́РКА** *ж*; *см.* **сво́ра** 1

**СВО́РНЫЙ,** -ая, -ое *охот.* сылбырҙағы, бәйҙәге (*этҡә ҡарата*)

**СВОРОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* урлау, урлап сығыу

**СВОРОТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* урынынан шыуҙырыу (ҡуҙғатыу); **свороти́ть ка́мень** ташты урынынан ҡуҙғатыу **2.** *разг.* ҡайырыу, бороу, ҡыйшайтыу; **свороти́ть забо́р** ҡойманы ҡыйшайтыу **3.** *что*; *перен., прост.* салшайтыу, ҡыйшайтыу (*йөҙҙө*); **свороти́ть ску́лу** яңаҡты салшайтыу **4.** *что*; *прост.* (*сделать что-л. большое, трудное*) эшләү, атҡарыу; **свороти́ть большо́е де́ло** ҙур эш атҡарыу **5.** *см.* **сверну́ть** 4—7

**СВОЯ́** *ж мест. см.* **свой**

**СВОЯ́К** *м* **1.** бажа **2.** *см.* **сво́йственник 3.** *разг.* үҙ кеше, әшнә

**СВОЯ́ЧЕНИЦА** *ж* (*сестра жены — старшая*) ҡәйенбикә; (*младшая*) балдыҙ, ҡайынһеңле

**СВЫКА́ТЬСЯ** *несов. см.* **свы́кнуться**

**СВЫ́КНУТЬСЯ** *сов.* эйәләшеп (күнегеп, ғәҙәтләнеп) китеү, эйәләшеү, күнегеү, ғәҙәтләнеү, килешеү; **ребёнок свы́кся со мной** бала миңә эйәләште; **свы́кнуться с обстано́вкой** тирә-яҡ хәлгә күнегеү

**СВЫСОКА́** *нареч.* һауаланып, маһайып, эреләнеп, тәкәбберләнеп, ҡуҡрайып; **относи́ться свысока́** *к кому-л. кемгәлер* маһайып ҡарау

**СВЫ́ШЕ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* юғарынан, өҫтән; **по предписа́нию свы́ше** юғарынан алынған бойороҡ буйынса **2.** *предлог с род. п.* -дан/-дән тыш (артыҡ, артығыраҡ, ашыу); **свы́ше пяти́** биштән артыҡ

**СВЯ́ЗАННОСТЬ** *ж* иркен булмау, тотҡарлыҡлы булыу, яйһыҙ (уңайһыҙ) булыу; **свя́занность движе́ний** хәрәкәттең яйһыҙ булыуы

**СВЯ́ЗАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **связа́ть 2.** *прил.* ҡыйынлыҡ (ауырлыҡ) менән, иркен булмаған, яйһыҙ, уңайһыҙ, тотҡарлыҡлы; **свя́занные движе́ния** ҡыйынлыҡ менән хәрәкәт итеү **3.** *прил.*;

*хим.* ҡушылған, ҡатнашҡан, ҡушылмалы, ҡатнашмалы; **свя́занный кислоро́д** ҡатнашмалы кислород

**СВЯЗА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (тоташтырып) бәйләү; **связа́ть разо́рванную верёвку** өҙөлгән бауҙы тоташтырып бәйләү **2.** *что* беркетеү; **связа́ть плот** һал беркетеү **3.** *что* төйнәп (бәйләп) ҡуйыу; **связа́ть ве́щи в узело́к** нәмәләрҙе төйөнсөккә төйнәп ҡуйыу **4.** *кого-что* сырмап (уратып) бәйләү, бәйләп ҡуйыу, аяҡ-ҡулын бәйләп ҡуйыу; **связа́ть престу́пника** енәйәтсенең аяҡ-ҡулын бәйләп ҡуйыу **5.** *кого-что* (*установить сношения с кем-чем-л.*) бәйләү, бәйләнешкә индереү; **связа́ть свою́ судьбу́** *с кем-л. кем менәндер* үҙ яҙмышыңды бәйләү; **связа́ть заво́д с зака́зчиками** заводты заказ биреүселәр менән бәйләнешкә индереү **6.** *кого-что* (*сблизить нравственно, духовно*) яҡынайтыу, берләштереү; **их связа́ла судьба́** уларҙы яҙмыш берләштерҙе; **нас всех связа́ло го́ре** беҙҙең барыбыҙҙы ла ҡайғы яҡынайтты **7.** *что* (*установить сообщение между чем-л.*) тоташтырыу, бәйләү; **э́ти города́ свя́жет автостра́да** был ҡалаларҙы үҙ-ара автомобиль юлдары тоташтырасаҡ **8.** *что, с чем* (*совместить как части единого целого*) бергә (бер үк ваҡытта) алып барыу, бергә башҡарыу, бәйләү; **связа́ть тео́рию с пра́ктикой** теория менән практиканы бәйләү **9.** *кого-что; перен.* (*стеснить*) ҡыҫыу, быуыу, юл ҡуймау; **связа́ть инициати́ву** инициативаға юл ҡуймау; **связа́ть во́лю** теләген (ынтылышын) ҡыҫыу, ирек бирмәү **10.** *что* бәйләү; **связа́ть шаль** шәл бәйләү; **связа́ть носки́** ойоҡбаш бәйләү ♦ **связа́ть по рука́м и нога́м** *см.* **рука́**

**СВЯЗА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*скрепиться друг с другом*) бәйләнеү; **связа́ться ремнём** ҡайыш менән бәйләнеү **2.** *с кем-чем* (*установить сношения*) бәйләнешкә инеү; **связа́ться с роди́тельским комите́том** ата-әсәләр комитеты менән бәйләнешкә инеү **3.** (*установить связь при помощи технических средств*) бәйләнешкә (элемтәгә) инеү; **связа́ться по телефо́ну** телефон аша бәйләнешкә инеү **4.** *с кем-чем; разг.* (*сблизиться, завести общие дела*) бәйләнеү, бәйләнешкә инеү

**СВЯЗИ́СТ** *м* **1.** элемтә хеҙмәткәре, элемтәсе **2.** *см.* **связно́й** 2

**СВЯЗИ́СТКА** *ж см.* **связи́ст** 1

**СВЯ́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **связа́ть** 2; **свя́зка плото́в** һалдарҙы беркетеү **2.** бәйләм; **свя́зка ключе́й** асҡыстар бәйләме; **свя́зка лу́ка** һуған бәйләме **3.** *анат.* бәйләүес, тарамыш; **растяже́ние свя́зок** тарамыш тартылыу **4.** *грам.* хәбәр бәйләүесе (*ҡушма хәбәр составындағы ярҙамсы ҡылым*) ♦ **голосовы́е свя́зки** *см.* **голосово́й**

**СВЯЗНО́Й,** -ая, -ое **1.** бәйләнеш (элемтә) тотоусы, бәйләнеш (элемтә) тотоу өсөн тәғәйенләнгән; **связно́й офице́р** бәйләнеш тотоусы офицер **2.** *в знач. сущ.* **связно́й** *м* элемтәсе (*хәрби частарҙа*); **посла́ть связно́го** элемтәсе ебәреү **3.** *спец.* тоташтырыусы, нығытыусы (*нәмә*); **связно́й болт** нығытыусы болт; **связны́е до́ски** тоташтырыусы таҡталар

**СВЯ́ЗНОСТЬ** *ж* бәйләнешле булыу, бәйләнешлелек, төҙөклөк; **свя́зность ре́чи** телмәрҙәге бәйләнешлелек; **свя́зность изложе́ния** телмәрҙәге бәйләнешлелек

**СВЯ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое бәйләнешле, төҙөк; **свя́зная речь** бәйләнешле телмәр; **свя́зный расска́з** төҙөк хикәйә

**СВЯ́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* бәйләй (тоташтыра) торған; **свя́зочный аппара́т суста́ва** быуынды тоташтыра торған аппарат

**СВЯЗУ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее *книжн.* **1.** *прич. от* **свя́зывать 2.** *прил.* бәйләй (ҡатыра, тоташтыра) торған, бәйләүсе, тоташтырыусы; **связу́ющее звено́** тоташтырыусы быуын

**СВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **связа́ть** 1—9; **2.** *что* и *без доп.* бөрөштөрөү, ҡамаштырыу; **тани́н свя́зывает** танин ауыҙҙы бөрөштөрә

**СВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **связа́ться 2.** *страд. от* **свя́зывать** 1

**СВЯЗЬ** *ж* **1.** (*взаимные отношения между кем-чем-л.*) бәйләнеш, бәйләү; **связь ме́жду промы́шленностью и се́льским хозя́йством** сәнәғәт менән ауыл хужалығы араһындағы бәйләнеш; **ро́дственные свя́зи** туғанлыҡ бәйләнештәре; **торго́вые свя́зи** сауҙа бәйләнештәре **2.** (*тесное общение*) элемтә, бәйләнеш, яҡын мөнәсәбәт; **подде́рживать связь** *с кем-л. кем менәндер* яҡын мөнәсәбәттә булыу **3.** (*внутреннее единство с кем-л.*) тығыҙ бәйләнеш, берлек; **име́ть связь с наро́дом** халыҡ менән бәйләнештә булыу **4.** элемтә, бәйләнеш; **телефо́нная связь** телефон аша бәйләнеш; **косми́ческая связь** йыһан менән бәйләнеш **5.** элемтә; **рабо́тники свя́зи** элемтә хеҙмәткәрҙәре

**СВЯ́СЛО** *с* көлтә бауы

**СВЯТЕ́ЙШИЙ,** -ая, -ее изгеләрҙән изге (*православие патриархының, Синодтың һәм Рим папаһы титулының состав өлөшө*)

**СВЯТИ́ЛИЩЕ** *с* **1.** (*храм*) ғибәҙәтхана **2.** *чего; перен.* изге (мөҡәддәс) урын (усаҡ, сығанаҡ); **святи́лище нау́ки** фәндең изге усағы

**СВЯТИ́ТЬ** *несов. что* изгеләндереү, изгегә әйләндереү (*христиан динендә*)

**СВЯ́ТКИ** *мн.* Святки (*христиандарҙа Раштыуанан алып Крещениеға тиклем байрам көндәр*)

**СВЯТО́Й,** -ая, -ое **1.** *рел.* (*божественный*) гөнаһһыҙ, саф, изге, дини, илаһи; **свято́й дух** изге рух; **Свято́е Ева́нгелие** Изге Инжил **2.** *высок.* ҡәҙерле, изге, ғәзиз; **свята́я Ро́дина** ғәзиз Ватан; **свята́я земля́** ғәзиз ер; **свята́я па́мять об отце́** атайымдан ҡалған изге ҡомартҡы **3.** (*безгрешный, непорочный*) гәйебе (гөнаһы) булмаған, керһеҙ, саф, изге; **свято́й челове́к** изге кеше; **свята́я любо́вь** саф мөхәббәт **4.** (*обязательный, непреложный*) иң ҡәҙерле, бөйөк, мөҡәддәс; **свята́я обя́занность** мөҡәддәс бурыс; **свято́е де́ло** изге

эш **5.** *в знач. сущ.* **свято́й** *м* и **свята́я** *ж* әүлиә, изге ♦ **Свята́я неде́ля** Изге аҙна (*Пасха байрамы аҙнаһы*); **свята́я святы́х** *высок.* мөҡәддәс, ҡәҙерлеләрҙән ҡәҙерле, изгенән изге

**СВЯ́ТОСТЬ** *ж* изгелек, әүлиәлек, илаһилыҡ; **свя́тость до́лга** бурыстың изгелеге

**СВЯТОТА́ТЕЦ** *м* хур (мыҫҡыл) итеүсе, мәсхәрәләүсе, мыҫҡыллаусы

**СВЯТОТА́ТСТВО** *с* мәсхәрәләү (*сиркәц өсөн изге нәмәне хурлау*)

**СВЯТОТА́ТСТВОВАТЬ** *несов.* хур (мыҫҡыл, мәсхәрә) итеү, мыҫҡыллау, мәсхәрәләү

**СВЯТО́ША** *м* и *ж* (*ханжа*) мөнафиҡ, ике йөҙлө кеше

**СВЯ́ТЦЫ** *мн.* святцы (*христиандарҙа әүлиәләр һәм дини байрамдар исемлеге китабы*)

**СВЯТЫ́НЯ** *ж*; *высок.* иң ҡәҙерле (иң изге, иң мөҡәддәс) нәмә (урын); **боево́е зна́мя — святы́ня полка́** хәрби байраҡ — полктың иң изге нәмәһе

**СВЯЩЕ́ННИК** *м* священник (*рухани*)

**СВЯЩЕННОДЕ́ЙСТВИЕ** *с* **1.** *рел.* ғибәҙәт ҡылыу **2.** *перен.*, *ирон.* тантаналы башҡарыу, һыҙыҡ өҫтөнә алыу

**СВЯЩЕННОДЕ́ЙСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** *рел.* ғибәҙәт ҡылыу **2.** *перен.*, *ирон.* тантаналы башҡарыу, һыҙыҡ өҫтөнә алыу

**СВЯЩЕННОСЛУЖИ́ТЕЛЬ** *м* дин хеҙмәтсеһе, дин әһеле, рухани

**СВЯЩЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *рел.*, *церк.* изге, мөҡәддәс, дини; **свяще́нные кни́ги** изге китаптар; **свяще́нный обря́д** дини йола **2.** (*глубоко чтимый*, *святой*) иң ҡәҙерле, ғәзиз, изге; **свяще́нная страна́** ғәзиз ил **3.** (*благоговейный*) хөрмәтле, ихтирамлы; **свяще́нный восто́рг** ихтирамлы һоҡланыу **4.** (*благородный*) изге; **свяще́нный долг** изге бурыс **5.** (*неприкосновенный*, *незыблемый*) ҡаҡшамаҫ, емерелмәҫ, ныҡлы, тотороҡло; **свяще́нные рубежи́ Ро́дины** Ватандың ныҡлы сиктәре ♦ **Свяще́нная исто́рия** Изге тарих (*Тәүраттағы текст*)

**СВЯЩЕ́НСТВО** *с* **1.** рухани дәрәжәһе **2.** *собир.* священниктар, руханиҙар, дин әһелдәре

**СВЯЩЕ́НСТВОВАТЬ** *несов.* священник вазифаһын үтәү, священник булыу

**СГИБ** *м* **1.** *спец. см.* **согну́ть — сгиба́ть** 1—4; **2.** бөгөлгән (бөкләнгән, кәкрәйгән) урын (ер), бөгөм; **сгиб в ло́кте** терһәк бөгөмө; **сгиб газе́ты** гәзиттең бөкләнгән ере

**СГИБА́ТЬ** *несов. см.* **согну́ть**

**СГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **согну́ться** **2.** *страд. от* **сгиба́ть**

**СГИ́НУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** әллә ҡайҙа булыу, юҡҡа сығыу, юғалыу; **ста́рое сги́нуло** иҫке юҡҡа сыҡты **2.** *прост.* (*погибнуть*, *умереть*) һәләк булыу, үлеү ♦ **сгинь с (мои́х) глаз!** *прост.* күҙҙән юғал!

**СГЛА́ДИТЬ** *сов. что* **1.** тигеҙ (шыма) итеү, тигеҙләү, шымартыу; (*о морщинах*) йыйырсыҡты бөтөрөү; **сгла́дить пове́рхность земли́** ер өҫтөн тигеҙләү **2.** (*уничтожить*, *умерить различия*) юҡҡа сығарыу, кәметеү **3.** (*смягчить*) йомшартыу, һиҙелмәҫлек итеү, бөтөрөү, юйыу; **сгла́дить противоре́чия** ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы бөтөрөү ♦ **сгла́дить (о́стрые) углы́** көсөргәнешлекте йомшартыу

**СГЛА́ДИТЬСЯ** *сов.* **1.** шымарыу, тигеҙләнеү, ҡытыршыһы бөтөү; **морщи́ны на лбу сгла́дились** маңлайҙағы йыйырсыҡтар шымарҙы **2.** юҡҡа сыға барыу, кәмей (бөтә) төшөү; **с года́ми его́ недоста́тки сгла́дились** йылдар уҙыу менән уның етешһеҙ яҡтары кәмей төштө **3.** (*смягчиться*) кәмеү, юйылыу, шымарыу; **острота́ го́ря сгла́дилась не ско́ро** ҡайғының ауырлығы тиҙ генә юйылманы

**СГЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **сглода́ть**

**СГЛА́ДЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сгла́дывать**

**СГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **сгла́дить**

**СГЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сгла́диться** **2.** *страд. от* **сгла́живать**

**СГЛАЗ** *м*; *разг. см.* **сгла́зить**; **боя́ться сгла́зу** күҙ тейеүҙән ҡурҡыу

**СГЛА́ЗИТЬ** *сов. кого-что* күҙ тейҙереү, күҙектереү; **сгла́зить ребёнка** балаға күҙ тейҙереү

**СГЛОДА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* кимереп бөтөрөү (ҡуйыу); **сглода́ть кость** һөйәкте кимереп бөтөрөү

**СГЛОТА́ТЬ** *сов. что*; *прост.* ҡомһоҙланып (һоғоноп) ашап бөтөрөү; **сглота́ть мя́со** итте ҡомһоҙланып ашап бөтөрөү

**СГЛОТНУ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* йотоп ебәреү

**СГЛУПИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* йүләрлек (ахмаҡлыҡ) эшләп ташлау

**СГНА́ИВАТЬ** *несов. см.* **сгнои́ть**

**СГНА́ИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сгна́ивать**

**СГНИВА́ТЬ** *несов. см.* **сгни́ть**

**СГНИ́ТЬ** *сов.*; *прям.*, *перен.* сереү, сереп бөтөү; **се́но сгни́ло** бесән серене

**СГНОИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прям.*, *перен.*, *разг.* серетеү, серетеп бөтөрөү; **сгнои́ть карто́фель** картуфты серетеү

**СГОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **сговори́ть** 1, 2

**СГОВА́РИВАТЬСЯ** *несов. см.* **сговори́ться** 1

**СГО́ВОР** *м* **1.** кәләш эйттереү, ҡыҙ йәрәшеү, килешеү, йәрәшеү (*туй йолаһы*) **2.** һүҙ ҡуйышыу, һүҙ беркетеү, килешеү; **престу́пный сго́вор** енәйәтле килешеү

**СГОВОРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *уст.* (*помолвить*) кәләш эйттереү, ҡыҙ йәрәшеү, килешеү, йәрәшеү, һүҙ ҡуйышыу **2.** *кого*; *прост.* (*уговорить*) күндереү, килештереү, ризалатыу **3.** *с кем*; *прост. см.* **сговори́ться** 2

**СГОВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һүҙ ҡуйышыу (беркетеү), һөйләшеү, килешеү; **сговори́ться о встре́че** осрашырға һүҙ ҡуйышыу; **сговори́ться пойти́ в кино́** киноға барырға һөйләшеү **2.** аңлашыу, килешеү, уртаҡ тел табыу; **с ним тру́дно сговори́ться** уның менән уртаҡ тел табыуы ҡыйын

**СГОВО́РЧИВОСТЬ** *ж* ыңғайға килеүсәнлек, һүҙгә килеүсәнлек; **сгово́рчивость ребёнка** баланың ыңғайға килеүсәнлеге

**СГОВО́РЧИВЫЙ,** -ая, -ое (*уступчивый*) ыңғайға килеүсән, килешеүсән, килешеп (аңлашып) була торған; **сгово́рчивый челове́к** килешеп була торған кеше

**СГОДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* (*пригодиться*) кәрәге (файҙаһы) тейеү, кәрәк (файҙаһы) булыу

**СГОН** *м* **1.** *см.* **согна́ть** — **сгоня́ть** I 1—3; **сгон скота́ на прода́жу** малдарҙы һатырға ҡыуып алып барыу; **сгон плото́в** һалдарҙы ҡыуғынлау **2.** *спец.* (*понижение уровня моря или озера у берегов под действием ветра*) һыу кәмеү (ҡайтыу)

**СГО́ННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* (*предназначенный для сгонки, сплава*) ҡыуғын (*ағыҙыу өсөн әҙерләнгән*); **сго́нный лес** ҡыуғын ағас

**СГО́НЩИК** *м* ҡыуғынсы; **сго́нщик плото́в** һалдар ҡыуғынсыһы

**СГОНЯ́ТЬ I** *несов. см.* **согна́ть**

**СГОНЯ́ТЬ II** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что* алып (алып барып) ҡайтыу; **сгоня́ть лошаде́й на водопо́й** аттарҙы һыу эсереп алып ҡайтыу **2.** (тиҙ генә) ҡайтып (барып) килеү; **сгоня́ть за тетра́дями** дәфтәр артынан тиҙ генә ҡайтып килеү

**СГОНЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **сгоня́ть** I

**СГОРА́ЕМОСТЬ** *ж* яныусанлыҡ; **сгора́емость угля́** күмерҙең яныусанлығы

**СГОРА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое яныусан, яна торған, янып бара торған; **сгора́емые материа́лы** яныусан материалдар

**СГОРА́НИЕ** *с см.* **сгора́ть**; **сгора́ние то́плива** яғыулыҡтың яныуы ♦ **дви́гатель вну́треннего сгора́ния** эске яныулы двигатель

**СГОРА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **сгоре́ть 2.** *спец.* химик тарҡалыу (*органик матдәләргә ҡарата*)

**СГО́РБИТЬ** *сов. кого-что* **1.** *см.* **го́рбить 2.** (*сделать согнутым, сутулым*) бөгөү, бөкрәйтеү, көмрәйтеү; **го́ды сго́рбили его́** йылдар уны бөкрәйтте

**СГО́РБИТЬСЯ** *сов.* **1.** *см.* **го́рбиться 2.** (*стать согнутым, сутулым*) бөкрәйеү, көмрәйеү; **сго́рбиться от ста́рости** ҡартлыҡтан бөкрәйеү

**СГО́РБЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сго́рбить 2.** *прил.* бөкрө, көмрө; **сго́рбленный стари́к** бөкрө ҡарт

**СГОРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** яныу, янып бөтөү; **сгоре́ть дотла́** янып көлгә әйләнеү; **сгоре́ть от мо́лнии** йәшендән яныу **2.** (*подгореть*) аҫты яныу, көйөү; **пиро́г сгоре́л** бәлеш көйгән **3.** эшлектән сығыу, боҙолоу, яныу; **утю́г сгоре́л** үтек янды **4.** (*иссохнуть от зноя*) ҡыуға әйләнеү, ҡыуарыу, кибеү, ҡороу, көйөү, яныу; **тра́вы сгоре́ли** үләндәр ҡороно; **посе́вы сгоре́ли** игендәр көйҙө **5.** *разг.* (*сильно загореть*) ҡояшҡа бешеү, яныу (*тәнгә ҡарата*) **6.** (*сгнить, сопреть от перегрева при слёживании*) яныу, ҡыҙыу, ҡыҙып боҙолоу (сереү); **зерно́ сгоре́ло** иген ҡыҙған; **се́но сгоре́ло** бесән янған **7.** *перен.* (*о человеке*) юҡҡа сығыу, яныу ♦ **сго́реть от стыда́** ояттан ер тишегенә инерҙәй булыу

**СГОРЯЧА́** *нареч.* ҡыҙыулыҡ менән, ҡыҙып (китеп); **наговори́ть сгоряча́** ҡыҙып әйтеп ташлау

**СГОТО́ВИТЬ** *сов. что*; *разг.* бешереп (әҙерләп) ҡуйыу; **сгото́вить обе́д** төшкөләккә әҙерләп ҡуйыу

**СГРЕБА́ТЬ** *несов. см.* **сгрести́**

**СГРЕБА́ТЬСЯ I** *несов. страд. от* **сгреба́ть**

**СГРЕБА́ТЬСЯ II** *несов. см.* **сгрести́сь**

**СГРЕСТИ́** *сов. что* **1.** тырмалап өйөү (йыйыу), күбәләү; **сгрести́ се́но** бесән күбәләү **2.** (*гребя чем-л., сбросить откуда-л.*) (көрәп) төшөрөү (ташлау, ырғытыу); **сгрести́ снег с кры́ши** түбәнән ҡар төшөрөү **3.** *кого-что*; *прост.* (*с силой обхватить*) ҡосаҡлап алыу, ҡосағына эләктереп (күтәреп) алыу

**СГРЕСТИ́СЬ** *сов.*; *разг.* бергәләп ишә-ишә яйлашып (яраҡлашып) китеү

**СГРУДИ́ТЬ** и **СГРУ́ДИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* бер ергә (урынға) өйөү; **сгруди́ть бума́ги** ҡағыҙҙарҙы бер ергә өйөү **2.** *кого* бер ергә (урынға) туплау (йыйыу); **сгруди́ть ове́ц** һарыҡтарҙы бер ергә туплау; **сгруди́ть дете́й** балаларҙы бер урынға йыйыу

**СГРУДИ́ТЬСЯ** и **СГРУ́ДИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* өйкөләшеү, өймәкләшеү, тупланыу, йыйылыу; **ста́до сгруди́лось** көтөү өйкөләштө

**СГРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **сгрузи́ть**

**СГРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сгрузи́ться 2.** *страд. от* **сгружа́ть**

**СГРУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **сгруди́ть**

**СГРУ́ЖИВАТЬСЯ** *несов. см.* **сгруди́ться**

**СГРУЗИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*снять какой-л. груз с чего-л.*) бушатыу, төшөрөү, бушатып бөтөрөү; **сгрузи́ть мешки́ с маши́ны** машинанан тоҡтарҙы бушатыу **2.** (*сложить снимаемый груз где-л., на что-л.*) тейәү (*йөктө*); **сгрузи́ть ве́щи на подво́ду** нәмәләрҙе ылауға тейәү

**СГРУЗИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бушатыныу, төшөп ҡалыу

**СГРУППИРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* төркөмдәргә йыйыу, төркөм-төркөм итеү, төркөмләү, туплау; **сгруппирова́ть уча́щихся** уҡыусыларҙы төркөмләү

**СГРУППИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* төркөмдәргә йыйылыу, төркөмләшеү, тупланыу

**СГРУСТНУ́ТЬ** *сов. см.* **взгрустну́ть**

**СГРУСТНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **взгрустну́ться**

**СГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **сгрызть**

**СГРЫЗАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сгрыза́ть**

**СГРЫЗТЬ** *сов. что* **1.** кимереп ашау (бөтөрөү), ярыу, кимереп (ярып) ашап бөтөрөү; **сгрызть кость** һөйәкте кимереп бөтөрөү **2.** *перен.*, *разг.* ғазаплау, яфалау

**СГУБИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** һәләк (әрәм) итеү, башына етеү, башын ашау **2.** тормошон

боҙоу, бәхетһеҙ итеү; **сгуби́ть жизнь** *чью-л. кемдеңдер* тормошон боҙоу **3.** (*привести в негодность*) әрәм итеү, боҙоу; **сгуби́ть те́хнику** техниканы боҙоу

**СГУСТИ́ТЕЛЬ** *м*; *спец.* **1.** ҡуйыртҡыс (*аппарат*) **2.** (*вещество*) ҡуйыртҡыс матдә

**СГУСТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡуйыртыу, ҡуйылау, ҡуйыландырыу; **сгусти́ть сиро́п** сиропты ҡуйыртыу **2.** (*сосредоточить в одном месте*) туплау, йыш итеү, йышайтыу ♦ **сгусти́ть кра́ски** шапыртып (арттырып) һөйләү

**СГУСТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡуйырыу, ҡуйыланыу; **раство́р сгусти́лся** иретмә ҡуйырған **2.** нык ҡуйырыу; **тума́н сгусти́лся** томан нык ҡуйырҙы **3.** тупланыу, йышайыу ♦ **атмосфе́ра сгусти́лась** көсөргәнеш артты, хәл ҡуйырҙы

**СГУ́СТОК** *м* ҡуйырыҡ, ойошҡан киҫәк, төйөр; **сгу́сток кро́ви** ҡан ҡуйырығы

**СГУЩА́ЕМОСТЬ** *ж* ҡуйырыусанлыҡ

**СГУЩА́ТЬ** *несов. см.* **сгусти́ть**

**СГУЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сгусти́ться** **2.** *страд. от* **сгуща́ть**

**СГУЩЕ́НИЕ** *с см.* **сгусти́ть** — **сгуща́ть**, **сгусти́ться** — **сгуща́ться**; **сгуще́ние раство́ра** иретмәнең ҡуйырыуы

**СГУЩЁНКА** *ж*; *разг.* ҡуйыртылған һөт

**СГУЩЁННОСТЬ** *ж* ҡуйылыҡ, йышлыҡ, тығыҙлыҡ; **сгущённость кра́сок** буяуҙарҙың ҡуйылығы; **сгущённость населе́ния в города́х** ҡалаларҙа халыҡтың тығыҙлығы

**СГУЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сгусти́ть** **2.** *прил.* ҡуйырған, ҡуйыртылған, ҡуйыландырылған; **сгущённое молоко́** ҡуйыртылған һөт

**СДА́БРИВАТЬ** *несов. см.* **сдо́брить**

**СДА́БРИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сда́бривать**

**СДАВА́ТЬ** *несов. см.* **сдать**

**СДАВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **сда́ться** **2.** (*отдаваться внаём, в аренду*) ваҡытлыса файҙаланырға (ҡуртымға) бирелеү (биреп торолоу) **3.** *страд. от* **сдава́ть** 1—7

**СДАВА́ТЬСЯ II** *несов. кому безл.*; *разг.* (*думаться, казаться*) минеңсә, минең уйлауымса; **мне сдаётся, что он прав** минең уйлауымса, ул хаҡлы

**СДАВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*плотно окружив, стиснуть*) нык итеп ҡыҫыу; **сдави́ть ру́ку** ҡулды нык итеп ҡыҫыу **2.** *что* ҡыҫыу, ҡыҫырыҡлау; **река́ сда́влена берега́ми** йылғаны ярҙары ҡыҫырыҡлаған **3.** *безл.* һыҡҡан, быуған һымаҡ итеү, ҡыҫыу; **сдави́ло грудь** күкрәкте ҡыҫты

**СДА́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сдави́ть** **2.** *прил.* (*приглушённый, сдерживаемый — о голосе, звуках*) быуылған, көсһөҙ, тонок; **сда́вленный го́лос** быуылған тауыш

**СДА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **сдави́ть**

**СДА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сда́вливать**

**СДА́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое тапшырыу ...ы; **сда́точный пункт** тапшырыу пункты; **сда́точный акт** тапшырыу акты

**СДА́ТЧИК** *м* и **СДА́ТЧИЦА** *ж* тапшырыусы; **сда́тчик молока́** һөт тапшырыусы

**СДАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *в разн. знач.* тапшырыу, биреү; **сдать хлеб госуда́рству** хөкүмәткә иген тапшырыу; **сдать бельё в сти́рку** керҙе йыуырға биреү; **сдать кровь на ана́лиз** анализға ҡан биреү; **сдать кни́ги в библиоте́ку** китапханаға китаптар тапшырыу; **сдать экза́мен по языку́** тел буйынса имтихан биреү; **сдать но́рмы по пла́ванию** йөҙөү буйынса норма тапшырыу **2.** (*возвратить излишек при денежном расчёте*) ҡайтарыу, ҡайтарып биреү; **сдать с рубля́ де́сять копе́ек** бер һумдан ун тин ҡайтарып биреү **3.** (*отдать внаём, в аренду*) ваҡытлыса (файҙаланырға) биреп тороу, ҡуртымға биреү; **сдать ко́мнату** ваҡытлыса бүлмә биреп тороу; **сдать зе́млю в аре́нду** ерҙе ҡуртымға биреү **4.** *что* (*уступить неприятелю*) (ташлап) ҡалдырыу, ҡалдырып китеү, биреү (*дошман яғында*); **сдать го́род** ҡаланы ҡалдырыу **5.** (*потерпев неудачу, отказаться от дальнейшей игры*) бирелеү, баш тартыу **6.** (*раздать играющим карты*) таратып биреү, өләшеү **7.** (*ослабить силу, напряжение чего-л.*) кәметеү, түбәнәйтеү, кәметә (түбәнәйтә) төшөү; **холода́ сда́ли** һыуыҡтар йомшара төштө; **сдать темп рабо́ты** эш темпын кәметеү **8.** (*стать слабее, утратить силу и т.д.*) көсөн (ҡеүәтен) кәметеү, йомшара төшөү **9.** бирешеү, бирешеп ҡалыу; **се́рдце сда́ло** йөрәк биреште ♦ **сдать пози́ции** уй-фекерҙән сигенеү, позицияны биреү; **сдать ору́жие** *см.* **сда́ться** 1

**СДА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** еңелеү, еңелеп бирелеү, бирелеү, төшөү; **сда́ться в плен** әсирлеккә төшөү; **а́рмия сдала́сь** армия еңелеп бирелде **2.** (*поддаться на что-л.*) килешеү, бирелеү, күнеү; **сда́ться на угово́ры** өгөткә (димгә) бирелеү

**СДА́ЧА** *ж* **1.** *см.* **сдать** — **сдава́ть** 1—7, **сда́ться** 1 — **сдава́ться** I; **сда́ча дежу́рства** дежурлыҡты тапшырыу; **сда́ча хле́ба госуда́рству** дәүләткә иген тапшырыу **2.** (*излишек денег, возвращаемый при расчёте*) сдача, ҡайтарым (*ҡайтарып бирелгән аҡса*); **получи́ть сда́чу** ҡайтарым алыу; **дать сда́чу** ҡайтарым биреү **3.** *перен.*, *разг.* (*ответ на удар или оскорбление*) ҡон, яуап; **дать сда́чу** ҡон ҡайтарыу

**СДВА́ИВАТЬ** *несов. см.* **сдво́ить**, **сдвои́ть** 1

**СДВА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сдво́иться**, **сдвои́ться** **2.** *страд. от* **сдва́ивать**

**СДВИГ** *м* **1.** *см.* **сдви́нуть** — **сдвига́ть** 1, 2, **сдви́нуться** — **сдвига́ться** 1, 2; **2.** *спец.* шыуышыу (*көс тәьҫир иткәндә, есем молекулаларының бер-береһенә күсеше*) **3.** *геол.* күсеү, күсеш, шыуышыу; **сдвиг земно́й коры́** ер ҡабығының шыуышыуы **4.** *перен.* үҙгәреш, үҫеш, алға китеш; **сдвиг в де́ле** эштәге үҫеш

**СДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **сдви́нуть**

**СДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сдви́нуться** **2.** *страд. от* **сдвига́ть**

**СДВИЖНО́Й,** -ая, -ое күсермәле, күсмә; **сдвижно́й стол** күсермәле өҫтәл

**СДВИ́НУТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*двигая, переместить*) шылдырып (этәреп) күсереү, шылдырыу, ҡуҙғатыу; **сдви́нуть маши́ну с ме́ста** машинаны урынынан ҡуҙғатыу **2.** *перен.* сигендереү (*уҙ фекеренән кире ҡайтартыу*) **3.** (*сблизить*) йәнәш (бер-береһенә терәтеп) ҡуйыу, йәнәш килтереп ҡуйыу; (*о бровях*) йыйырыу; **сдви́нуть столы́** өҫтәлдәрҙе бер-береһенә терәтеп ҡуйыу; **сдви́нуть бро́ви** ҡаш йыйырыу

**СДВИ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** (*тронуться с места*) шылыу, шыуыу, ҡуҙғалыу; **маши́на сдви́нулась с ме́ста** машина урынынан ҡуҙғалды **2.** (*переместиться*) шылып (ҡуҙғалып) ултырыу, шылып (ҡуҙғалып) китеү; **сдви́нуться с кра́я дива́на** дивандың ситенән шылып ултырыу **3.** (*сблизиться*) яҡынлашыу; (*о бровях*) йыйырылыу; **бро́ви сдви́нулись** ҡаштар йыйырылды

**СДВО́ИТЬ** *сов. что* ике рәт (икешәр-икешәр) итеп теҙеү; **сдво́ить ряды́** рәттәрҙе икешәр-икешәр итеп теҙеү

**СДВОИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ике ҡатлау, ике ҡат итеү; **сдвои́ть дра́тву** еп осон ике ҡатлау **2.** *с.-х.* икенсе ҡат һөрөү; **сдвои́ть па́шню** баҫыуҙы икенсе ҡат һөрөү

**СДВО́ИТЬСЯ** *сов.* ике рәт итеп теҙелеү, икешәр-икешәр булып теҙелеү; **ряды́ сдво́ились** рәттәр икешәр-икешәр булып теҙелде

**СДВОИ́ТЬСЯ** *сов.* икешәр ҡат булыу, ике ҡатланыу

**СДЕ́ЛАТЬ** *сов. см.* **де́лать** ♦ **сде́лай(те) ми́лость** *см.* **ми́лость**; **сде́лай(те) одолже́ние** *см.* **одолже́ние**; **де́ло сде́лано** эше бөткән

**СДЕ́ЛАТЬСЯ** *сов. см.* **де́латься**

**СДЕ́ЛКА** *ж* һүҙ ҡуйышыу, һүҙ беркетешеү, килешеү, вәғәҙәләшеү; **торго́вая сде́лка** сауҙа килешеүе; **биржева́я сде́лка** биржа килешеүе ♦ **сде́лка с со́вестью** намыҫҡа көс килтереү, выжданға хыянат итеү

**СДЕ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое килешеү, һүҙ ҡуйышыу; **сде́лочная за́пись** килешеү яҙыуы

**СДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое эшкә ҡарап, эш башынан, эш күләменән, эшкә ҡарап (эш күләменән) түләнә торған; **сде́льная опла́та** эшкә ҡарап түләү; **сде́льная рабо́та** эш күләменән түләнә торған хеҙмәт

**СДЕ́ЛЬЩИК** *м* и **СДЕ́ЛЬЩИЦА** *ж*; *разг.* эш күләменән (эшкә ҡарап) түләү алған эшсе

**СДЕ́ЛЬЩИНА** *ж*; *разг.* эш күләменән (эшкә ҡарап) түләнә торған хеҙмәт

**СДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **сдёрнуть**

**СДЁРГИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сдёргивать**

**СДЕ́РЖАННО** *нареч.* **1.** (*сдерживая себя*) баҫалҡы, тыйнаҡ, тотанаҡ **2.** вайымһыҙ (күңел һалмай, тыныс, һалҡын) ғына/генә, иҫ китмәй генә, ныҡ иғтибар итмәй генә; **сде́ржанно приня́ть предложе́ния** тәкдимдәрҙе иҫ китмәй генә ҡабул итеү; **сде́ржанно отнести́сь** тыныс ҡына ҡарау

**СДЕ́РЖАННОСТЬ** *ж* тотанаҡлылыҡ, тыйнаҡлыҡ, баҫалҡылыҡ, иплелек; **сде́ржанность то́на** мөғәмәлә итеүҙәге тотанаҡлылыҡ; **сде́ржанность движе́ния** хәрәкәттәге иплелек

**СДЕ́РЖАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сдержа́ть** **2.** *прил.* (*умеющий владеть собой*) тотанаҡлы, тыйнаҡлы, баҫалҡы, ипле; **сде́ржанный челове́к** тотанаҡлы кеше **3.** *прил.* (*спокойный*) сабыр, тыныс

**СДЕРЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* тотоу; **пти́цу в во́здухе сде́рживают кры́лья** ҡошто һауала ҡанаттары тота **2.** тотоп тороу, туҡтатыу, ҡаршы тора алыу; **сдержа́ть на́тиск проти́вника** дошман һөжүмен туҡтатыу **3.** тыйыу, тыйып (йәшереп) ҡалыу; **сдержа́ть слёзы** күҙ йәшен тыйып ҡалыу; **сдержа́ть волне́ние** тулҡынланыуҙы йәшереп ҡалыу **4.** тотоу, үтәү, тороу; **сдержа́ть сло́во** һүҙҙә тороу; **сдержа́ть кля́тву** антыңды үтәү

**СДЕРЖА́ТЬСЯ** *сов.* тыйылып (үҙеңде тотоп) ҡалыу, сыҙау, түҙеү, ҡаршы тора алыу; **сдержа́ться от жела́ния сказа́ть** әйтеү теләгенән тыйылып ҡалыу

**СДЕ́РЖИВАТЬ** *несов. см.* **сдержа́ть**

**СДЕ́РЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сдержа́ться** **2.** *страд. от* **сде́рживать**

**СДЁРНУТЬ** *сов. что* тартып төшөрөү (алыу, сисеү); **сдёрнуть ска́терть со стола́** өҫтәлдән ашъяулыҡты тартып алыу

**СДИРА́ТЬ** *несов. см.* **содра́ть**

**СДИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **содра́ться** **2.** *страд. от* **сдира́ть**

**СДИ́РКА** *ж*; *спец. см.* **содра́ть** — **сдира́ть** 1, 2

**СДИ́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* һыҙырғыс, һыҙыра (ҡайыҙлай) торған; **сди́рочный инструме́нт** һыҙырғыс ҡорал

**СДО́БА** *ж* сдоба (**1.** *һөт, май, йомортҡа һ.б. тәмләткестәр ҡушылған ҡамыр* **2.** *собир. тәмләткестәр һалып бешерелгән ҡаластар*)

**СДО́БИТЬ** *несов. что*; *разг.* ҡамырға тәмләткестәр һалыу

**СДО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сдобалы, тәмләткестәр ҡушып (һалып) баҫылған (бешерелгән); **сдо́бное те́сто** сдобалы ҡамыр **2.** *перен., разг., шутл.* (*полный — о человеке, его теле*) һимеҙ, өрөп тултырылған һымаҡ, тулы кәүҙәле

**СДО́БРИТЬ** *сов. что* **1.** тәм өсөн өҫтәү, ҡатыу; **сдо́брить суп катыко́м** ашҡа ҡатыҡ ҡатыу **2.** *перен.* йәнләндереү, биҙәү, өҫтәп ебәреү; **сдо́брить речь посло́вицами** телмәрҙе мәҡәлдәр менән биҙәү

**СДО́ХНУТЬ** *сов.* **1.** *разг.* (*издохнуть — о животных*) үлеү, ҡырылыу (*мал-тыуарға ҡарата*) **2.** *груб., прост.* (*умереть — о человеке*) дөмөгөү, тонсоғоу (*кешегә ҡарата*)

**СДРЕ́ЙФИТЬ** *сов. см.* **дре́йфить**

**СДРЕЙФОВА́ТЬ** *сов.*; *мор.* ел ыңғайына ағыу (*караптарға, боҙға ҡарата*)

**СДРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **сдружи́ть**

**СДРУЖА́ТЬСЯ** *несов. см.* **сдружи́ться**

**СДРУЖИ́ТЬ** *сов.* яҡынлаштырыу, дуҫлаштырыу; **сдружи́ть однокла́ссников** синыфташтарҙы дуҫлаштырыу

**СДРУЖИ́ТЬСЯ** *сов.* дуҫлашыу, дуҫлашып (яҡынайып) китеү; **бы́стро сдружи́ться** тиҙ дуҫлашыу

**СДУВА́ТЬ** *несов. см.* **сдуть**, **сду́нуть**

**СДУВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **сдува́ть**

**СДУ́НУТЬ** *сов. что*; *разг. см.* **сдуть** 1

**СДУРЕ́ТЬ** *сов.*; *прост.* аҡылдан яҙыу, аҡылһыҙланыу, йүләрләнеү, хыялыйланыу

**СДУРИ́ТЬ** *сов.*; *прост.* йүләрлек (ахмаҡлыҡ) эшләп ташлау (*уйламай берәй нәмә эшләү*)

**СДУ́РУ** *нареч.*; *разг.* аҡылһыҙланып, йүләрләнеп, ахмаҡланып, ахмаҡлыҡ (йүләрлек) менән

**СДУТЬ** *сов.* **1.** өрөп ебәреү (төшөрөү, осороу), өрҙөрөү; **сдуть шелуху́ с зерна́** ашлыҡтың кәүәген өрҙөрөү **2.** *прост.* (*списать тайком*) кешенекен (кешенән) күсереп алыу (яҙыу); **сдуть сочине́ние** иншаны кешенән күсереп алыу ♦ **то́чно (сло́вно, как) ве́тром сду́ло** күҙ асып йомғансы юҡ булыу

**СДЫХА́ТЬ** *несов. см.* **сдо́хнуть**

**СЁ**: **то да сё** теге лә был; **ни то ни сё**: 1) (*о чём-л. неопределённом*) ни аллаға ни муллаға; 2) (*о чём-л. среднем, посредственном*) насар ҙа түгел, яҡшы ла түгел; **ни с того́ ни с сего́** тиктомалға, тик торғанда, ерле юҡҡа

**СЕА́НС** *м*; *в разн. знач.* сеанс; **де́тский сеа́нс** балалар сеансы; **пойти́ в кино́ на вече́рний сеа́нс** киноға киске сеансҡа барыу; **сеа́нс гипно́за** гипноз сеансы

**СЕБЕ** *частица*; *разг.* (*подчёркивает независимость действия*); **иди́ себе** бара ғына бир; ♦ **ничего́ себе!** ғәжәп икән!, хәтәр икән!

**СЕБЕСТО́ИМОСТЬ** *ж* үҙкиммәт; **сниже́ние себесто́имости** үҙкиммәтте кәметеү

**СЕБЯ́** *мест.* үҙ, үҙем, үҙең, үҙ-үҙе; **боя́ться за себя́** үҙең өсөн ҡурҡыу; **испы́тывать на себе́** үҙ елкәңдә татыу ♦ **вне себя́** *см.* **вне**; **к себе́**: 1) үҙеңә табан; **дверь открыва́ется к себе́** ишек үҙеңә тартып асыла; 2) үҙенә, үҙ өйөнә, йәшәгән (торған) еренә табан; **он пошёл к себе́** ул үҙ өйөнә ҡайтып китте; **не в себе́** кәйефһеҙ, борсоулы, тыныс түгел; **не по себе́**: 1) (*нездоровится*) ауырып (сырхап) тороу, сәләмәтлеге (һаулығы) ҡаҡшап тороу; 2) (*неловко, неудобно*) уңайһыҙ, йәйһыҙ, уңайһыҙ булып китеү, уңайһыҙлыҡ кисереү; **прийти́ в себя́**: 1) тынысланыу; 2) аңға (иҫкә) килеү; **приня́ть (взять) на себя́** (*согласиться быть ответственным за что-л.*) үҙ өҫтөңә (елкәңә) алыу; **про себя́**: 1) (*тихо*) шыпырт ҡына, ҡысҡырмайынса, үҙ алдына; 2) (*мысленно*) эстән генә, эстән уйлап ҡына; **сам (сама́, само́) по себе́** *см.* **сам**; **само́ собо́й**; **само́ собо́й разуме́ется** *см.* **сам**; **себе́ на уме́** аҫтыртын, хәйләкәр; **у себя́** өйөңдә, үҙеңдә, эш урыныңда

**СЕБЯЛЮ́БЕЦ** *м* үҙемсе, мин-минлекле кеше (*эгоист*)

**СЕБЯЛЮБИ́ВЫЙ**, -ая, -ое үҙемселекле, үҙемсе …ы, мин-минле, мин-минлек …ы

**СЕБЯЛЮ́БИЕ** *с* мин-минлек, үҙемселек

**СЕВ** *м см.* **се́ять** 1; **подгото́вка к весе́ннему се́ву** яҙғы сәсеүгә әҙерлек

**СЕ́ВЕР** *м*; *в разн. знач.* төньяҡ; **се́вер Башкортоста́на** Башҡортостандың төньяғы; **путеше́ствие на се́вер** төньяҡҡа сәйәхәт; **наро́ды Кра́йнего Се́вера** Алыҫ Төньяҡ халыҡтары

**СЕ́ВЕРНЫЙ**, -ая, -ое төньяҡ, төньяҡ …ы; **се́верный ве́тер** төньяҡ еле; **Се́верный по́люс** Төньяҡ полюс; **се́верный оле́нь** төньяҡ боланы

**СЕ́ВЕРО-ВОСТО́К** *м* төньяҡ-көнсығыш; **держа́ть курс на се́веро-восто́к** төньяҡ-көнсығышҡа табан юл тотоу

**СЕ́ВЕРО-ВОСТО́ЧНЫЙ**, -ая, -ое төньяҡ-көнсығыш, төньяҡ-көнсығыш …ы; **се́веро-восто́чный ве́тер** төньяҡ-көнсығыш еле

**СЕ́ВЕРО-ЗА́ПАД** *м* төньяҡ-көнбайыш; **напра́виться на се́веро-за́пад** төньяҡ-көнбайышҡа йүнәлеү

**СЕ́ВЕРО-ЗА́ПАДНЫЙ**, -ая, -ое төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш …ы; **се́веро-за́падная часть го́рода** ҡаланың төньяҡ-көнбайыш өлөшө

**СЕВЕРЯ́НЕ** *мн.* (*ед.* **северя́нин** *м* и **северя́нка** *ж*) төньяҡ халҡы (кешеләре)

**СЕВО́К** *м* орлоҡ һуған

**СЕВООБОРО́Т** *м* сәсеү әйләнеше

**СЕВРЮ́ГА** *ж* уҡбаш, уҡморон (*балыҡ*)

**СЕВРЮ́ЖИЙ**, -ья, -ье уҡбаш …ы, уҡморон …ы; **севрю́жья икра́** уҡбаш ыуылдырығы

**СЕВРЮ́ЖИНА** *ж* уҡбаш (уҡморон) ите

**СЕГМЕ́НТ** *м* **1.** *мат.* сегмент (*түңәрәктең дуға һәм хорда менән сикләнгән, шарҙың яҫылыҡ менән киҫелгән өлөшө*); **пло́щадь сегме́нта** сегмент майҙаны **2.** *зоол.*, *анат.* быуын, быуынтыҡ; **сегме́нты дождево́го червя́** селәүсен быуынтыҡтары **3.** *тех.* сегмент (*ҡайһы бер деталдәрҙең исеме*); **сегме́нт по́ршня** поршень сегменты

**СЕГМЕНТА́РНЫЙ**, -ая, -ое *зоол.*, *анат.* сегментар, быуынтыҡ, быуынлы; **сегмента́рные о́рганы** быуынлы ағзалар

**СЕГМЕНТАЦИО́ННЫЙ**, -ая, -ое *биол.* сегментацион; **сегментацио́нное деле́ние** сегментацион бүленеш

**СЕГМЕНТА́ЦИЯ** ж; *биол.* сегментация (**1.** *ҡайһы бер йән эйәләре тәҙәлөшөнөң сегменттарҙан тороуы, йәки айырым органдарҙың быуындарҙан тороуы* **2.** *яралғы үҫкәндә йомортҡаның күҙәнәктәргә бүленеүе*)

**СЕГМЕ́НТНЫЙ**, -ая, -ое *спец.* сегмент …ы; **сегме́нтная пове́рхность** сегмент йөҙө

**СЕГО́ДНЯ** *нареч.* **1.** бөгөн; **сего́дня у́тром** бөгөн иртән; **сего́дня ве́чером** бөгөн кис; **сего́дня днём** бөгөн көндөҙ **2.** *в знач. сущ.* **сего́дня** *с нескл.* бөгөн, бөгөнгө көн; **на сего́дня дово́льно** бөгөнгә етер ♦ **не сего́дня за́втра** *см.* **за́втра**

**СЕГО́ДНЯШНИЙ,** -яя, -ее бөгөнгө; **сего́дняшний день** бөгөнгө көн; **сего́дняшний разгово́р** бөгөнгө һөйләшеү; **сего́дняшняя газе́та** бөгөнгө гәзит ♦ **жить сего́дняшним днём** киләсәк тураһында уйламау, бөгөнгө менән йәшәү

**СЕДА́ЛИЩЕ** *с* арт һан, ултырыш

**СЕДА́ЛИЩНЫЙ,** -ая, -ое арт һан ...ы, ултырыш ...ы; **седа́лищная кость** ултырыш һөйәге

**СЕДЁЛКА** *ж* ыңғырсаҡ

**СЕДЕ́ЛЬНИК** *м* эйәр яһаусы

**СЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое эйәр ...ы; **седе́льная лука́** эйәр ҡашы

**СЕДЕ́ЛЬЧАТЫЙ,** -ая, -ое эйәр һымаҡ, эйәргә оҡшаған

**СЕДЕ́ТЬ** *несов.* ағарыу, ағара башлау, сал төшөү (кереү), салланыу; **во́лосы седе́ют** сәстәр ағара

**СЕДИНА́** *ж* **1.** сал, аҡ (*ағарған сәс, һаҡал*); **у него́ на виска́х седина́** сикәһенә сал төшкән **2.** (*проседь в мехе*) аҡлы, буҙ, аҡ тимгелле (төктәре булған); **со́боль с седино́й** аҡ тимгелле кеш **3.** (*серовато-белый цвет*) аҡһыл (буҙ) төҫ ♦ **дожи́ть до седи́н** оҙаҡ йәшәү

**СЕДЛА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** эйәрләү; **седла́ть коня́** ат эйәрләү **2.** *воен.* (*захватывать, закрепляясь*) ҡулға төшөрөү, яулап алыу; **седла́ть доро́ги** юлдарҙы ҡулға төшөрөү

**СЕДЛА́ТЬСЯ** *несов.* эйәрләнеү

**СЕДЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое һығылма билле (*атҡа ҡарата*); **седли́стые ко́ни** һығылма билле аттар

**СЕДЛО́** *с* **1.** эйәр; **беговое седло́** бәйге эйәре; **кавалери́йское седло́** кавалерия эйәре; **сиде́ть в седле́** эйәрҙә ултырыу **2.** *см.* **седлови́на** 3 ♦ **вы́бить (вы́шибать) из седла́** *кого-л. кемделер* сығырынан сығарыу; **сиди́т как на коро́ве седло́** *прост.* һыйырға септә япҡан кеүек

**СЕДЛОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** һығылма билле (*атҡа ҡарата*); **седлова́тая ло́шадь** һығылма билле ат **2.** *спец.* эйәр рәүешендәге, ике яғы ҡалҡыу (урын); **седлова́тая па́луба** ике яғы ҡалҡыу палуба

**СЕДЛОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое эйәр формаһындағы, эйәр; **седлови́дный суста́в** эйәр быуын (*мәҫ., шаушаҡта*)

**СЕДЛОВИ́НА** *ж* **1.** (*прогиб на спине животного*) бил; **седлови́на коня́** ат биле **2.** (*прогиб в каком-л. предмете*) бил, бөгөл; **седлови́на но́са** танау биле **3.** (*продолговатая впадина в горном хребте*) бил, билән; **седлови́на ме́жду двумя́ верши́нами** ике түбә араһындағы билән

**СЕДЛО́ВКА** *ж*; *спец.* **1.** *см.* **седла́ть** 1; **2.** эйәрләү (*ысул*); **учёбная седло́вка** эйәрләргә өйрәнеү; **похо́дная седло́вка** оҙайлы юлға ат эйәрләү

**СЕДОБОРО́ДЫЙ,** -ая, -ое аҡ (сал) һаҡаллы; **седоборо́дый стари́к** аҡ һаҡаллы ҡарт

**СЕДОБРО́ВЫЙ,** -ая, -ое аҡ (сал) ҡашлы

**СЕДОВОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое аҡ (сал) сәсле; **седоволо́сый челове́к** сал сәсле кеше

**СЕДОГОЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое аҡ (сал) башлы

**СЕДО́Й,** -ая, -ое **1.** аҡ, ағарған, сал, салланған; **седа́я борода́** аҡ һаҡал; **седы́е во́лосы** сал сәс **2.** (*с белыми волосами*) ап-аҡ (сал) сәсле, ағарған (салланған) сәсле; **седо́й стари́к** сал сәсле ҡарт **3.** аҡ тимгелле (*йәнлек тиреһенә ҡарата*); **седо́й бобр** аҡ тимгелле ҡондоҙ **4.** (*серовато-белый*) аҡһыл; **седо́й тума́н** аҡһыл томан **5.** *перен.* (*древний*) бик боронғо, ҡарт, сал; **седо́й Ура́л** сал Урал; **седа́я старина́** бик боронғо заман ♦ **до седы́х воло́с** сәс ағарғансы, ҡартайғансы

**СЕДО́К** *м* **1.** (*всадник*) һыбайлы **2.** мотоцикл (велосипед) йөрөткән кеше **3.** (*извозчик*) ылаусы, йөк ташыусы, күсер

**СЕДОУ́СЫЙ,** -ая, -ое аҡ (сал) мыйыҡлы; **седоу́сый челове́к** аҡ мыйыҡлы кеше

**СЕДЬМО́Й,** -ая, -ое *числ.* етенсе; **седьмо́й ме́сяц** етенсе ай; **седьмо́й класс** етенсе синыф; **седьмо́й час** етенсе сәғәт ♦ **до седьмо́го по́та** ете ҡат тир сыҡҡансы; **на седьмо́м не́бе быть** түбәһе күккә тейеү, атҡа менгәндәй булыу; **седьма́я вода́ на киселе́** *см.* **вода́**

**СЕЗО́Н** *м* **1.** (*время года*) миҙгел; **зи́мний сезо́н** ҡышҡы миҙгел, ҡыш миҙгеле; **ле́тний сезо́н** йәйге миҙгел, йәй миҙгеле **2.** *чего, какой* ваҡыт, мәл, осор, миҙгел; **сезо́н сеноко́са** бесән мәле; **театра́льный сезо́н** театр миҙгеле; **купа́льный сезо́н** һыу инеү ваҡыты ♦ **ба́рхатный сезо́н** *см.* **ба́рхатный**; **мёртвый сезо́н** *см.* **мёртвый**

**СЕЗО́ННИК** *м* и **СЕЗО́ННИЦА** *ж* миҙгелле эшсе, миҙгелле эштә эшләүсе

**СЕЗО́ННОСТЬ** *ж* миҙгеллелек, миҙгелле булыу; **сезо́нность сельскохозя́йственных рабо́т** ауыл хужалығы эштәренең миҙгелле булыуы

**СЕЗО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** миҙгелле; **сезо́нная рабо́та** миҙгелле эш **2.** бер миҙгеллек; **сезо́нный биле́т** бер миҙгеллек билет; **сезо́нная оде́жда** бер миҙгеллек кейем

**СЕЙ** *м* (сия *ж*, сие *с*) *мест.*; *книжн.*, *уст.* был, ошо, шул; **на сей раз** был юлы, бынығында; **по сей день** ошо көнгә тиклем ♦ **сию́ мину́ту (секу́нду)** хәҙер үк, ошо минутта (секундта), һә тигәнсе, күҙ асып йомғансы; **от сих до сих** *шутл.* бынан алып бында тиклем; **не от ми́ра сего́** *см.* **мир**; **ни с того́ ни с сего́** *см.* **тот**

**СЕЙМ** сейм (**1.** *ҡайһы бер илдәрҙә ҡатламлы вәкәләтле ойошмалар атамаһы* **2.** *Рәсәй империяһы составында 1809—1917 йй. автономия хоҡуғында торған Бөйөк Финляндия кенәзлегенең атамаһы* **3.** *Польша парламенты*)

**СЕ́ЙНЕР** *м* сейнер (*балыҡ тотоуға тәғәйенләнгән диңгеҙ судноһы*)

**СЕЙСМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сейсмик (*ер тетрәүгә мөнәсәбәтле*); **сейсми́ческие колеба́ния** сейсмик тирбәлештәр; **сейсми́ческие явле́ния** сейсмик күренештәр; **сейсми́ческие о́бласти** сейсмик өлкәләр; **сейсми́ческая ка́рта** сейсмик карта; **сейсми́ческая ста́нция** сейсмик станция

**СЕЙСМОГРА́ММА** *ж* сейсмограмма (*ер тирбәлешен сейсмограф ярҙамында яҙыу һөҙөмтәһе*)

**СЕЙСМО́ГРАФ** *м* сейсмограф (*ер тетрәгәндәге йәки шартлатҡандағы тирбәлеште яҙа торған прибор*)

**СЕЙСМОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сейсмографик; **сейсмографи́ческая ста́нция** сейсмографик станция; **сейсмографи́ческие наблюде́ния** сейсмографик күҙәтеүҙәр

**СЕЙСМО́ЛОГ** *м* сейсмолог (*сейсмология белгесе*)

**СЕЙСМОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сейсмологик (*сейсмологияға мөнәсәбәтле*); **сейсмологи́ческие све́дения** сейсмологик мәғлүмәттәр

**СЕЙСМОЛО́ГИЯ** *ж* сейсмология (*геофизиканың ер тетрәүен һәм шуға бәйле күренештәрҙе өйрәнә торған бүлеге*)

**СЕЙСМО́МЕТР** *м* сейсмометр (*ер ҡабығындағы тирбәлештәрҙе үлсәй торған прибор*)

**СЕЙСМОМЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сейсмометрик (*сейсмометрияға мөнәсәбәтле*)

**СЕЙСМОМЕ́ТРИЯ** *ж* сейсмометрия (*сейсмологияның ер ҡабығы тирбәлешен теркәү ысулдарын өйрәнгән бүлеге*)

**СЕЙСМОСТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое сейсмологик көстәргә бирешмәй торған; **сейсмосто́йкие постро́йки** сейсмологик көстәргә бирешмәй торған төҙөлөш

**СЕЙСМОСТО́ЙКОСТЬ** *ж* сейсмологик көстәргә бирешмәүсәнлек

**СЕЙФ** *м* сейф (*аҡса, ҡиммәтле нәмәләр һ.б. һаҡлай торған махсус тимер шкаф*)

**СЕЙЧА́С** *нареч.* **1.** (*в данный момент*) ошо мәлдә, әле, хәҙер, хәҙерге моментта; **сейча́с зима́** хәҙер ҡыш; **я сейча́с за́нят** әле мин буш түгелмен **2.** (*немеделенно*) тиҙ генә, хәҙер үк; **сейча́с же иди́ домо́й** хәҙер үк өйөңә ҡайт **3.** (*только что*) әле генә, яңы ғына, хәҙер генә; **он сейча́с здесь был** ул әле генә бында ине

**СЕ́КАНС** *м*; *мат.* секанс (*тригономик функцияларҙың береһе*)

**СЕКА́ТОР** *м* секатор (*баҡса ҡайсыһы*); **сре́зать ве́тки сека́тором** секатор менән ботаҡтарҙы ҡырҡыу

**СЕКА́Ч** *м* **1.** ҡырҡҡыс, турағыс; **сека́ч для мя́са** ит турағыс **2.** *зоол.* (*взрослый самец кабана или морского котика*) ата ҡабан, ата диңгеҙ бесәйе

**СЕКВЕ́НЦИЯ** *ж*; *муз.* секвенция (*көйҙөң ҡабатланып килеүе*)

**СЕКВЕ́СТР** *м* секвестр (*хөкүмәттең дәүләт мәнфәғәтендә ниндәйҙер милектән файҙаланыуҙы тыйыуы йәки сикләүе*); **наложи́ть секве́стр** секвестр һалыу

**СЕКВЕСТРОВА́ТЬ** и **СЕКВЕСТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *юр.* секвестрлау, секвестр һалыу; **секвестрова́ть иму́щество** мөлкәтте секвестрлау

**СЕКВО́ЙЯ** *ж* секвойя (*Төньяҡ Америкала үҫеүсе ылыҫлы ағас*)

**СЕКИ́РА** *ж* айбалта

**СЕКРЕ́Т I** *м* **1.** сер; **держа́ть в секре́те** сер итеп тотоу; **сказа́ть по секре́ту** сер итеп әйтеү; **секре́т успе́ха** уңыштың сере **2.** (*потайное устройство*) йәшерен нәмә, ғиллә, сер; **замо́к с секре́том** серле йоҙаҡ **3.** *воен.* секрет (*дошман яғынан ҡуйылған өҫтәлмә йәшерен һаҡ*); **поста́вить секре́ты** секрет ҡуйыу ♦ **не секре́т** йәшерен түгел, сер түгел; **секре́т Полишине́ля** *см.* **Полишине́ль**

**СЕКРЕ́Т II** *м*; *физиол.* секрет (*кешелә һәм хайуандарҙа биҙҙәр бүлеп сығарған матдә, мәҫ., шайыҡ*)

**СЕКРЕТАРИА́Т** *м* секретариат (*ойошманың бүлеге һәм протоколсылар*)

**СЕКРЕТА́РСКИЙ,** -ая, -ое секретарлыҡ ...ы, сәркәтип ...ы, секретарь ...ы; **секрета́рская до́лжность** секретарлыҡ вазифаһы

**СЕКРЕТА́РСТВО** *с* секретарлыҡ

**СЕКРЕТА́РСТВОВАТЬ** *несов.* секретарлыҡ итеү, секретарь (сәркәтип) вазифаһын үтәү

**СЕКРЕТА́РША** *ж*; *разг.* секретарь, сәркәтип (*ҡатын-ҡыҙ*)

**СЕКРЕТА́РЬ** *м*; *в разн. знач.* секретарь, сәркәтип; **секрета́рь профко́ма** профком секретары ♦ **Госуда́рственный секрета́рь** Дәүләт секретары; **учёный секрета́рь** ғилми секретарь

**СЕКРЕТЕ́Р** *м* секретер (*яҙыу өҫтәленең төрө; яҙыу-һыҙыу өсөн шыуҙырмалы йәки ҡайтармалы таҡтаһы һәм тартмалары булған шкаф төрө*)

**СЕКРЕ́ТКА** *ж*; *разг., уст.* секретка (*конвертһыҙ ебәрелә торған махсус почта ҡағыҙы*)

**СЕКРЕ́ТНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** сер итеп тотоу, йәшереү **2.** сер һөйләшеү, серләшеү; **секре́тничать с подру́гой** әхирәт менән серләшеү

**СЕКРЕ́ТНО** *нареч.* серле, йәшертен, йәшереп, йәшерен, һиҙҙертмәй (белгертмәй) генә

**СЕКРЕ́ТНОСТЬ** *ж* йәшеренлек, серлелек, йәшерен (сер) булыу; **секре́тность перепи́ски** хатлашыуҙың йәшерен булыуы

**СЕКРЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое йәшерен, йәшертен, серле; **секре́тный докуме́нт** йәшерен документ; **секре́тный прика́з** йәшерен бойороҡ; **секре́тный ларе́ц** серле ҡумта

**СЕКРЕТО́РНЫЙ,** -ая, -ое *физиол.* секрет бүлеү, секрецияға мөнәсәбәтле; **секрето́рная де́ятельность желёз** биҙҙәрҙең секрет бүлеп сығарыуы

**СЕКРЕ́ЦИЯ** *ж*; *физиол.* секреция (*организмға тереклек өсөн кәрәк булған махсус матдәләрҙең биҙҙәре тарафынан яһалыуы һәм бүленеүе*)

**СЕКС** *м* секс, енси мөнәсәбәттәр, енси теләк (дәрт)

**СЕКСО́ЛОГ** *м* сексолог (*сексология белгесе*)

**СЕКСОЛО́ГИЯ** *ж* сексология (*енси мөнәсәбәттәр буйынса ғилми тикшеренеүҙәр өлкәһе*)

**СЕ́КСТА** *ж*; *муз.* секста (**1.** *диатоник гамманың алтынсы баҫҡысы* **2.** *бирелгән баҫҡыс менән диатоник гамманың алтынсыһы араһындағы интервал*)

**СЕКСТА́НТ** и *мор.* **СЕКСТА́Н** *м* секстант, секстан (*авиацияла һәм диңгеҙҙә ҡулланылған астрономик мөйөш үлсәү ҡоралмалы*)

**СЕКСТЕ́Т** *м*; *муз.* секстет (**1.** *алты тауыш йәки алты инструмент өсөн яҙылған музыка әҫәре* **2.** *алты башҡарыусынан торған ансамбль*)

**СЕКСУА́ЛЬНОСТЬ** *ж* шәһүәтле (*енси мөнәсәбәттәргә бәйле психик хәл*)

**СЕКСУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое енси теләкле, шәһүәтле, дәртле

**СЕ́КТА** *ж* секта (**1.** *хакимлыҡ иткән megдән айырылған дини төркөм* **2.** *күсм. тар мәнфәғәткә бикләнгән кешеләр төркөмө*)

**СЕКТА́НТ** *м* и **СЕКТА́НТКА** *ж* сектант (**1.** *секта ағзаһы* **2.** *күсм. ваҡ-төйәк мәнфәғәттәрҙе генә ҡайғыртыусы догматик ҡарашлы кеше*)

**СЕКТА́НТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** сектант(тар) ...ы, сектантлыҡ; **секта́нтская гру́ппа** сектанттар төркөмө **2.** сектанттарға хас; **секта́нтский хара́ктер** сектанттарға хас холоҡ

**СЕКТА́НТСТВО** *с*; *прям.*, *перен.* сектантлыҡ

**СЕ́КТОР** *м*; *в разн. знач.* сектор; **се́ктор кру́га** *мат.* түңәрәк секторы; **ю́жный се́ктор стадио́на** стадиондың көньяҡ секторы; **промы́шленный се́ктор** сәнәғәт секторы; **се́ктор учёта** учёт секторы

**СЕКТОРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сектор ...ы; **сектора́льное заседа́ние** сектор ултырышы

**СЕКУ́НДА** *ж*; *в разн. знач.* секунд; **пять секу́нд вре́мени** биш секунд ваҡыт; **углова́я секу́нда** *мат.* мөйөш секунды; **помолчи́ секу́нду!** берәй секунд тынып тор! ♦ **в (одну́) секу́нду** хәҙер үк, тиҙ генә; **секу́нда в секу́нду** әйтелгән ваҡытта, шул уҡ ваҡытта; **(одну́) секу́нду** әҙ генә көтөп тороғоҙ; **сию́ секу́нду** *см.* **сей**

**СЕКУНДА́НТ** *м* секундант (**1.** *дуэлдә ҡатнашҡан кешеләргә шаһит һәм аралашсы* **2.** *ярышта ҡатнашҡан кешенең ярҙамсыһы һәм аралашсыһы*)

**СЕКУ́НДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** секунд ...ы, секундлыҡ ...ы; **секу́ндная стре́лка** секундлыҡ уғы (теле) **2.** бер секундлыҡ; **секу́ндная рабо́та** бер секундлыҡ эш

**СЕКУНДОМЕ́Р** *м* секундомер (*секундтың өлөштәрен күрһәткән прибор*)

**СЕКУ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **сечь** 1, 2; **2.** *прил.*; *мат.* киҫеүсе; **секу́щая пло́скость** киҫеүсе яҫылыҡ **3.** *в знач. сущ.* **секу́щая** *ж*; *мат.* киҫеүсе тура һыҙыҡ

**СЕКЦИО́ННЫЙ I,** -ая, -ое **1.** секция ...ы; **секцио́нные заседа́ния** секция ултырыштары **2.** *спец.* секциялы, секциялап эшләнә торған; **секцио́нный шкаф** секциялы шкаф; **секцио́нная сбо́рка маши́н** машинаны секциялап йыйыу

**СЕКЦИО́ННЫЙ II,** -ая, -ое *мед.* ярыу ...ы; **секцио́нный зал** ярыу залы

**СЕ́КЦИЯ I** *ж*; *в разн. знач.* секция; **се́кция гото́вого пла́тья** әҙер кейемдәр секцияһы; **заседа́ние се́кций** секциялар ултырышы; **спорти́вная се́кция** спорт секцияһы

**СЕ́КЦИЯ II** *ж*; *мед.* ярыу, телеп ебәреү; **се́кция тру́па** мәйет ярыу

**СЕЛЕВО́Й** и **СЕ́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое сил ...ы, (көслө) ағым, шыуғын; **селево́й пото́к** сил ташҡыны (ағымы)

**СЕЛЁДКА** *ж* селёдка; **копчёная селёдка** ыҫланған селёдка

**СЕЛЁДОЧНИЦА** *ж* селёдка тәрилкәһе

**СЕЛЁДОЧНЫЙ,** -ая, -ое селёдка ...ы; **селёдочный хвост** селёдка ҡойроғо; **селёдочный паште́т** селёдка паштеты

**СЕЛЕЗЕ́НИЙ,** -ья, -ье ата өйрәк ...ы, күгәл ...ы; **селезе́ний пух** күгәл мамығы

**СЕЛЕЗЁНКА** *ж* талаҡ

**СЕЛЕЗЁНОЧНЫЙ,** -ая, -ое талаҡ ...ы

**СЕ́ЛЕЗЕНЬ** *м* ата өйрәк, күгәл

**СЕ́ЛЕЗНЕВЫЙ** и **СЕЛЕЗНЁВЫЙ,** -ая, -ое ата өйрәк ...ы, күгәл ...ы; **селезнёвое перо́** күгәл ҡауырһыны

**СЕЛЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* селектив (*һайлап, айырып алыу үҙенсәлегенә нигеҙләнгән*); **селекти́вные раствори́тели** селектив иреткестәр

**СЕЛЕ́КТОР** *м* селектор (*телефонда айырым-айырым бәйләнеште тәьмин иткән электромеханик ҡоролма*)

**СЕЛЕ́КТОРНЫЙ,** -ая, -ое селекторлы, селектор ...ы (*селектор ярҙамында башҡарылған, эшләнгән*); **селе́кторный аппара́т** селекторлы аппарат; **селе́кторная связь** селекторлы бәйләнеш

**СЕЛЕКЦИОНЕ́Р** *м* селекционер; **семина́р селекционе́ров** селекционерҙар семинары

**СЕЛЕКЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое селекция ...ы; **селекцио́нная рабо́та** селекция эше; **селекцио́нная ста́нция** селекция станцияһы

**СЕЛЕ́КЦИЯ** *ж* селекция (**1.** *агрономия менән зоотехниканың яңы үҫемлек төрҙәре һәм мал тоҡомдары булдырыу ысулдарын өйрәнә торған бүлеге* **2.** *ауыл хужалығының яңы үҫемлек төрҙәре һәм мал тоҡомдары сығарыу менән шөғөлләнгән тармағы*)

**СЕЛЕ́Н** *м* селен (*химик элемент*)

**СЕЛЕ́НИЕ** *с* ауыл

**СЕЛЕ́НИСТЫЙ,** -ая, -ое селенлы, селен ...ы; **селе́нистые минера́лы** селенлы минералдар

**СЕЛЕНИ́Т** *м* селенит (*аҡ, зәңгәр, һары төҫтәге минерал*; *гипстың бер төрө*)

**СЕЛЕНИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое селенит ...ы, селениттан яһалған; **селени́товые отложе́ния** селенит ҡатламдары; **селени́товая шкату́лка** селенит ҡумтаһы

**СЕЛЕНИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **селенит** *м* и **селенитка** *ж*) селениттар (*фәнни-фантастик әҙәбиәттә Айҙа йәшәүселәрҙең исеме*)

**СЕЛЕ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** селен ...ы, селенле; **селе́новая кислота́** селен кислотаһы **2.** селендан яһалған; **селе́новый фотоэлеме́нт** селендан яһалған фотоэлемент

**СЕЛЕНОДЕ́ЗИЯ** *ж* селенодезия (*планетологияла Ай төҙөлөшөн һәм ҙурлығын өйрәнгән бүлек*)

**СЕЛЕНОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое селенологик; **селенологи́ческие иссле́дования** селенологик тикшеренеүҙәр

**СЕЛЕНОЛО́ГИЯ** *ж* селенология (*Ай төҙөлөшөн һәм химик-минерологик составын өйрәнгән планетология бүлеге*)

**СЕЛИ́ТРА** *ж* селитра (*аммоний, калий, кальций, натрий нитраттарының дөйөм атамаһы*); **кали́йная сели́тра** калий селитраһы; **аммо́ниевая сели́тра** аммоний селитраһы

**СЕЛИ́ТРОВЫЙ,** -ая, -ое селитра ...ы

**СЕЛИ́ТРЯНЫЙ,** -ая, -ое **1.** селитра ...ы; **сели́тряные за́лежи** селитра ятҡылыҡтары **2.** селитралы; **сели́тряная кислота́** селитралы кислота

**СЕЛИ́ТЬ** *несов. кого-что* йәшәргә (торорға) индереү, урынлаштырыу (*фатирға һ.б.*)

**СЕЛИ́ТЬСЯ** *несов.* йәшәргә (торорға) инеү, урынлашыу, төпләнеү, нигеҙләнеү

**СЕЛО́** *с* **1.** ауыл; **торго́вое село́** сауҙа ауылы **2.** *собир.* ауыл, ауыл кешеләре ♦ **ни к селу́ ни к го́роду** ни аллаға ни муллаға, урынһыҙға, урынһыҙ, килешһеҙ

**СЕЛЬ** *м* шыуғын, сил (*бейек тау йылғаларының йырҙаларынан сығыу һөҙөмтәһендә ләм, ҡом-таш ҡатыш хәтәр ташҡын*)

**СЕЛЬ...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "ауыл" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **сельма́г** ауыл магазины

**СЕ́ЛЬДЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** сельдь ...ы; **се́льдевый про́мысел** сельдь аулау промыслаһы **2.** *в знач. сущ.* **се́льдевые** *мн.*; *зоол.* сельдтар ғаиләһе

**СЕЛЬДЕРЕ́Й** *м* сельдерей (*аш тәмләткес үҫемлек*)

**СЕЛЬДЕРЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое сельдерей ...ы; **сельдере́йный ко́рень** сельдерей тамыры

**СЕЛЬДЖУ́КИ** *мн.* (*ед.* **сельджу́к** *м*) сәлжүктәр (*XI б. Кесе Азияла, Иран һәм Ираҡ территорияларында ҙур дәүләт ойоштороп йәшәгән боронғо күсмә төрөкмән ҡәбиләләре*)

**СЕЛЬДЬ** *ж* сельдь; **кося́к се́льди** сельдь эркеүе ♦ **как сельде́й в бо́чке** шығырым тулы, энә төртөр урын юҡ

**СЕЛЬДЯНО́Й,** -ая, -ое сельдь ...ы; **сельдяна́я бо́чка** сельдь мискәһе

**СЕЛЬКО́Р** *м* (*сельский корреспондент*) селькор (*ауыл хәбәрсеһе*)

**СЕЛЬКО́РОВСКИЙ,** -ая, -ое селькор ...ы; **селько́ровская рабо́та** селькор эше

**СЕЛЬКУ́ПСКИЙ,** -ая, -ое селькуп ...ы; **сельку́пский язы́к** селькуп теле

**СЕЛЬКУ́ПЫ** *мн.* (*ед.* **сельку́п** *м* и **сельку́пка** *ж*)селькуптар, селькуп халҡы (*Түбән һәм Томск өлкәләрендә, шулай уҡ Красноярск крайында йәшәгән аҙ һанлы халыҡ*)

**СЕЛЬМА́Г** *м* сельмаг (*ауыл магазины*)

**СЕЛЬПО́** *с нескл.* сельпо (*ауыл ҡулланыусылар йәмғиәте һәм шул йәмғиәттең кооператив магазины*)

**СЕ́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* ауыл ...ы; **се́льская шко́ла** ауыл мәктәбе; **се́льская молодёжь** ауыл йәштәре; **се́льские обы́чаи** ауыл ғәҙәттәре; **се́льская ме́стность** ауыл ерҙәре; **се́льская интеллиге́нция** ауыл интеллигенцияһы ♦ **се́льское хозя́йство** ауыл хужалығы

**СЕЛЬСКОХОЗЯ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое ауыл хужалығы ...ы; **сельскохозя́йственные маши́ны** ауыл хужалығы машиналары; **сельскохозя́йственная вы́ставка** ауыл хужалығы күргәҙмәһе

**СЕЛЬСОВЕ́Т** *м* (*сельский совет*) сельсовет (*ауыл советы*)

**СЕЛЬЧА́НИН** *м* и *разг.* **СЕЛЬЧА́НКА** *ж* **1.** ауыл кешеһе, крәҫтиән **2.** *разг.* (*односельчанин*) ауылдаш

**СЕЛЯНИ́Н, СЕЛЯ́НИН** *м* и **СЕЛЯ́НКА** *ж* крәҫтиән, иген игеүсе

**СЕМА́НТИКА** *ж*; *лингв.* **1.** семантика (*һүҙҙең, грамматик форманың мәғәнәһе*); **сема́нтика сло́ва** һүҙҙең семантикаһы; **2.** *см.* **семасиоло́гия**

**СЕМАНТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лингв.* семантик, мәғәнәүи, мәғәнә яғынан; **семанти́ческий ана́лиз сло́ва** һүҙҙе мәғәнә яғынан тикшереү

**СЕМАСИО́ЛОГ** *м* семасиолог (*семасиология белгесе*)

**СЕМАСИОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое семасиологик; **семасиологи́ческие иссле́дования** семасиологик тикшеренеүҙәр

**СЕМАСИОЛО́ГИЯ** *ж* семасиология (*тел ғилемендә һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләрен, уларҙың үҙгәрешен өйрәнгән бүлек*)

**СЕМАФО́Р** *м* семафор; **огни́ семафо́ра** семафор уттары; **дать сигна́л семафо́ром** *мор.* семафор менән сигнал биреү

**СЕМАФО́РНЫЙ,** -ая, -ое семафор ...ы; **семафо́рный флажо́к** *мор.* семафор флагы; **семафо́рный сигна́л** семафор сигналы

**СЕМАФО́РЩИК** *м*; *мор.* семафорсы (*семафорҙы ҡараусы хеҙмәткәр*)

**СЁМГА** *ж* һөмбаш; **про́мысел сёмги** һөмбаш аулау промыслаһы

**СЕМЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғаиләле; **семе́йный челове́к** ғаиләле кеше **2.** *в знач. сущ.* **семе́йный** *м* и **семе́йная** *ж* ғаиләле кеше **3.** ғаилә ...ы; **се-**

**ме́йное сча́стье** ғаилә бәхете; **семе́йный пра́здник** ғаилә байрамы

**СЕМЕ́ЙСТВЕННОСТЬ** *ж* **1.** (*любовь к семье*) ғаиләне яратыусанлыҡ, ғаиләгә бирелгәнлек, ғаилә йәнле булыу; **отлича́ться семе́йственностью** ғаилә йәнле булыуы менән айырылып тороу **2.** әшнәлек, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ

**СЕМЕ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғаиләһен яратыусы, ғаилә йәнле; **семе́йственный челове́к** ғаилә йәнле кеше **2.** әшнәлек ...ы, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ ...ы; **семе́йственный подхо́д к подбо́ру ка́дров** кадрҙар һайлағанда әшнәлек мөнәсәбәте

**СЕМЕ́ЙСТВО** *с*; *в разн. знач.* ғаилә; **глава́ семе́йства** ғаилә башлығы; **прибавле́ние семе́йства** ғаилә ишәйеү (*бала тыуыу*); **семе́йство коша́чьих** *зоол.* бесәйҙәр (бесәй һымаҡтар) ғаиләһе; **семе́йство бобо́вых** *бот.* борсаҡтар (борсаҡ һымаҡтар) ғаиләһе; **семе́йство зла́ковых** *бот.* ҡыяҡлылар ғаиләһе

**СЕМЕНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* орлоҡто күп биргән

**СЕМЕНИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* йыбырлап атлау, ваҡ-ваҡ (йыбырлатып) баҫыу

**СЕМЕНИ́ТЬСЯ** *несов.* орлоҡланыу, орлоҡланып килеү; **горо́х семени́тся** борсаҡ орлоҡланып килә

**СЕМЕННИ́К I** *м* **1.** *бот.* (*плод или часть плода с семенами*) орлоҡлоҡ, орлоҡҡа ҡалдырылған үҫемлек **2.** *обычно мн.* **семенники́**; *с.-х.*, *бот.* орлоҡ; **семенники́ свёклы** сөгөлдөр орлоғо; **огуре́ц-семенни́к** орлоҡ ҡыяры **3.** *с.-х.* (*участок для выращивания семенных растений*) орлоҡлоҡ участка

**СЕМЕННИ́К II** *м*; *анат.* орлоҡ биҙе, аталыҡ (*ирҙәрҙең енес биҙе*)

**СЕМЕННО́Й,** -ая, -ое **1.** орлоҡ ...ы; **семенны́е коро́бочки** орлоҡ төймәлеге **2.** (орлоҡтан) сәсеп үҫтерелгән (үҫтерелә торған); **семенны́е насажде́ния** сәсеп үҫтерелгән ағастар **3.** орлоҡҡа ҡалдырылған, орлоҡлоҡ; **семенна́я пшени́ца** орлоҡҡа ҡалдырылған бойҙай **4.** орлоҡ үҫтерелә торған, орлоҡлоҡ ...ы; **семенно́й уча́сток** орлоҡ үҫтерелә торған участка **5.** *физиол.* аталыҡ орлоғо ...ы, сперма ...ы, мәней ...ы; **семенно́й кана́л** орлоҡ каналы

**СЕМЕНОВО́Д** *м* орлоҡсолоҡ белгесе

**СЕМЕНОВО́ДСТВО** *с* орлоҡсолоҡ; **занима́ться семеново́дством** орлоҡсолоҡ менән шөғөлләнеү

**СЕМЕНОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое орлоҡсолоҡ ...ы; **семеново́дческая о́пытная ста́нция** орлоҡсолоҡ тәжрибә станцияһы

**СЕМЕРИ́К** *м* ете, етелек, етеле, етенән торған, ете үлсәүле, ете үлсәү; **семери́к овса́** ете үлсәү һоло; **семери́к хле́ба** ете бот иген; **верёвка семери́к** ете ҡаттан ишелгән арҡан; **семери́к лошаде́й** етенән егелгән аттар

**СЕМЁРКА** *ж* **1.** (*цифра*) ете, ете һаны, етелек **2.** *разг.* (*группа из семи единиц*) етенән, ете кешенән (торған); **семёрка пловцо́в** ете кешенән торған йөҙөүселәр төркөмө **3.** *карт.* етелек

**СЕ́МЕРО** *числ. собир.* ете, етәү; **се́меро мужчи́н** ете ир; **се́меро бра́тьев** ете (бер) туған; **се́меро су́ток** ете тәүлек ♦ **се́меро одного́ не ждут** етәү берәүҙе көтмәй

**СЕМЕ́СТР** *м* семестр; **учё́бный семе́стр** уҡыу семестры; **трудово́й семе́стр** хеҙмәт семестры

**СЕМЕ́СТРОВЫЙ** и **СЕМЕСТРО́ВЫЙ,** -ая, -ое семестр ...ы; **семе́стровый экза́мен** семестр имтиханы

**СЕ́МЕЧКО** *с* **1.** *уменьш. от* **се́мя** 1; **2.** (*семя в плоде растения*) ем, емеш, орлоҡ, төш; **арбу́зные се́мечки** ҡарбуз төштәре **3.** *мн.* **се́мечки** көнбағыш; **грызть се́мечки** көнбағыш ярыу

**СЕ́МЕЧКОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** көнбағыш ...ы; **се́мечковая лузга́** көнбағыш ҡабығы; **се́мечковая халва́** көнбағыш хәлүәһе **2.** *бот.* емле, орлоҡло, төшлө; **се́мечковые плодо́вые дере́вья** төшлө емеш ағастары

**СЕМИГРА́ННИК** *м* етеҡыр

**СЕМИДЕСЯТИЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) етмеш йыл **2.** (*годовщина*) етмеш йыллыҡ (йәшлек)

**СЕМИДЕСЯТИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) етмеш йыллыҡ; **семидесятиле́тний срок догово́ра** килешеүҙең етмеш йыллығы **2.** (*о возрасте*) етмештәге, етмеш йәшлек (йәштәге); **семидесятиле́тний челове́к** етмеш йәшлек кеше

**СЕМИДЕСЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* етмешенсе; **семидеся́тые го́ды** етмешенсе йылдар

**СЕМИДНЕ́ВКА** *ж*; *разг.* ете көн(лөк)

**СЕМИДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ете көнлөк; **семидне́вный срок** ете көнлөк мөҙҙәт; **семидне́вный похо́д** ете көнлөк поход **2.** ете көнгә етерлек, ете көнлөк; **семидне́вный запа́с проду́ктов** ете көнгә етерлек аҙыҡ

**СЕМИЖИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* бик таҙа (көслө), бик түҙем

**СЕМИКЛА́ССНИК** *м* и **СЕМИКЛА́ССНИЦА** *ж* етенсе синыф уҡыусыһы, етенсе синыфта уҡыусы

**СЕМИКЛА́ССНЫЙ,** -ая, -ое ете класс (синыфлыҡ); **семикла́ссное образова́ние** ете синыфлыҡ белем

**СЕМИКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ете тапҡыр **2.** етеләтә, ете тапҡыр; **семикра́тное сниже́ние ро́зничных цен** хаҡтарҙың етеләтә кәмеүе

**СЕМИЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) ете йыл **2.** (*годовщина*) ете йыллыҡ (йәшлек); **отмеча́ть семиле́тие** ете йыллыҡты билдәләү

**СЕМИЛЕ́ТКА I** *ж*; *разг.* (*школа*) ете йыллыҡ мәктәп; **око́нчить семиле́тку** ете йыллыҡ мәктәпте тамамлау

**СЕМИЛЕ́ТКА II** *ж см.* **семиле́ток**

**СЕМИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** ете йыллыҡ; **семиле́тнее образова́ние** ете йыллыҡ белем; **семиле́тний план** ете йыллыҡ план **2.** (*о возрасте*) ете йәшлек

**СЕМИЛЕ́ТОК** *м* и **СЕМИЛЕ́ТКА** *ж*; *разг.* ете йәшлек бала

**СЕМИЛИНЕ́ЙКА** *ж*; *разг.*, *уст.* етеле лампа (шәм)

**СЕМИМИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ете миль оҙонлоғондағы ♦ **семими́льными шага́ми идти́ (дви́гаться) вперёд** *см.* **шаг**

**СЕМИНА́Р** *м* семинар (**1.** *юғары уҡыу йортонда уҡытыусы етәкселегендә үткәрелә торған практик дәрес* **2.** *квалификацияны күтәреү маҡсатында үткәрелә торған дәрес, түңәрәк*); **семина́р агита́торов** агитаторҙар семинары

**СЕМИНАРИ́СТ** *м*; *уст.* семинарист (*семинария уҡыусыһы*)

**СЕМИНА́РИЯ** *ж* семинария (**1.** *революцияға тиклем Рәсәйҙә урта педагогик уҡыу йорто* **2.** *урта дини уҡыу йорто*)

**СЕМИНА́РСКИЙ I,** -ая, -ое семинар ...ы; **семина́рские заня́тия** семинар дәрестәре

**СЕМИНА́РСКИЙ II,** -ая, -ое семинария ...ы; **семина́рское образова́ние** семинария белеме

**СЕМИО́ТИКА** *ж* семиотика (*тамғалар үҙенсәлеген һәм системаларын тикшергән фән*); **языкова́я семио́тика** тел семиотикаһы

**СЕМИПО́ЛЬЕ** *с* ете баҫыулыҡ (*ерҙе ете баҫыуға бүлеп башҡарылған сәсеү әйләнеше системаһы*)

**СЕМИПО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ете баҫыулы; **семипо́льный севооборо́т** ете баҫыулы сәсеү әйләнеше

**СЕМИСОТЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) ете йөҙ йыл **2.** (*годовщина чего-л.*) ете йөҙ йыллыҡ

**СЕМИСОТЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) ете йөҙ йыл **2.** ете йөҙ йыллыҡ; **семисотле́тний юбиле́й** ете йөҙ йыллыҡ юбилей

**СЕМИСО́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* ете йөҙөнсө; **семисо́тый но́мер** ете йөҙөнсө номер

**СЕМИТИ́ЗМ** *м* семитизм (*семит телдәренең береһенән үҙләштерелгән һүҙ йәки әйтем*)

**СЕМИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое семит ...ы; **семити́ческие языки́** семит телдәре

**СЕМИТО́ЛОГ** *м* семитолог (*семитология белгесе*)

**СЕМИТОЛО́ГИЯ** *ж* семитология (*семит телле халыҡтарҙың телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен һәм тарихын өйрәнгән фәндәр*)

**СЕМИ́ТСКИЙ,** -ая, -ое семит ...ы; **семи́тские языки́** семит телдәре

**СЕМИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **семи́т** *м* и **семи́тка** *ж*) семиттар, семит халыҡтары (*Алғы Азия, Төньяҡ һәм Көнсығыш Африканың бер өлөшөндә йәшәгән халыҡтар төркөмө — боронғо вавилондар, ассирийҙар, финикийҙар, иудейҙар һәм хәҙерге ғәрәптәр, йәһүдтәр, эфиоптар һ.б.*)

**СЕМИУГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ете мөйөшлө; **семиуго́льная пло́щадь** ете мөйөшлө майҙан

**СЕМИЧАСОВО́Й,** -ая, -ое **1.** ете сәғәтлек; **семичасово́й рабо́чий день** ете сәғәтлек эш көнө **2.** ете сәғәттәге, сәғәт етеләге; **семичасово́й по́езд** сәғәт етеләге поезд

**СЕМНА́ДЦАТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* ун етенсе; **семна́дцатый год** ун етенсе йыл; **семна́дцатый дом** ун етенсе йорт

**СЕМНА́ДЦАТЬ** *числ.* ун ете

**СЁМУЖИЙ,** -ья, -ье һөмбаш ...ы; **сёмужья икра́** һөмбаш ыуылдырығы

**СЕМЬ** *числ.* ете; **семь челове́к** ете кеше; **семь рубле́й** ете һум ♦ **семь бед — оди́н отве́т** мең бәләгә бер яуап; **семь раз отме́рь, оди́н раз отре́жь** ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ; **за семью́ замка́ми** ете ҡат ер аҫтында; **семи́ пя́дей во лбу** бик аҡыллы, алланың ҡашҡа тәкәһе; **семь пото́в сошло́** ете ҡат тир сығарыу, йән тирҙәр сығарыу; **семь пя́тниц на неде́ле** аҙнаһына биш йома; бер тегеләй, бер былай; рәте-сираты юҡ; **кни́га за семью́ печа́тями** *см.* **кни́га**; **за семь вёрст киселя́ хлеба́ть** *см.* **кисе́ль**

**СЕ́МЬДЕСЯТ** *числ.* етмеш; **се́мьдесят киломе́тров** етмеш километр; **се́мьдесят лет** етмеш йәш

**СЕМЬСО́Т** *числ.* ете йөҙ; **семьсо́т рубле́й** ете йөҙ һум; **семьсо́т голо́в скота́** ете йөҙ баш мал

**СЕ́МЬЮ** *нареч.* етең, ете (тапҡыр); **се́мью семь — со́рок де́вять** ете етең ҡырҡ туғыҙ

**СЕМЬЯ́** *ж*; *в разн. знач.* ғаилә; **многоде́тная семья́** күп балалы ғаилә; **глава́ семьи́** ғаилә башлығы; **семья́ ка́ктусов** *бот.* кактустар ғаиләһе; **семья́ наро́дов Башкортоста́на** Башҡортостан халыҡтары ғаиләһе; **семья́ тю́ркских языко́в** *лингв.* төрки телдәре ғаиләһе ♦ **в семье́ не без уро́да** бейәнән ала ла тыуа, ҡола ла тыуа

**СЕМЬЯНИ́Н** *м* и **СЕМЬЯНИ́НКА** *ж* ғаилә йәнле кеше, ғаиләле кеше

**СЕ́МЯ** *с* **1.** орлоҡ; **конопля́ное се́мя** киндер орлоғо **2.** *мн.* **семена́** орлоҡ, сәсеү орлоғо; **проста́ние семя́н** орлоҡтарҙың шытыуы; **протра́вливание семя́н** орлоҡ ағыулау **3.** *чего*; *перен.* яралғы, башланғыс, сығанаҡ, сәбәп; **семена́ раздо́ра** ыҙғыш сығанағы **4.** *физиол. см.* **спе́рма**

**СЕМЯДО́ЛИ** *мн.* (*ед.* **семядо́ля** *ж*); *бот.* орлоҡ бәбәктәре (*бәбәктәге тәүге япраҡтар*)

**СЕМЯДО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *бот.* бәбәк ...ы; **семядо́льные ли́стья** бәбәк япраҡтары

**СЕМЯИЗВЕРЖЕ́НИЕ** *с*; *физиол. см.* **семяизлия́ние**

**СЕМЯИЗЛИЯ́НИЕ** *с*; *физиол.* шәрғәт һыуы бүленеү

**СЕМЯ́НКА** *ж*; *бот.* орлоҡса, орлоҡ емеше (*ҡаты ҡабыҡлы бер орлоҡло емештәр, мәҫ., көнбағыш*)

**СЕМЯНО́ЖКА** *ж*; *бот.* орлоҡ һабы

**СЕМЯПО́ЧКА** *ж*; *бот.* орлоҡ бөрөһө (бәбәге, яралғыһы)

**СЕМЯПРОВО́Д** *м* орлоҡ юлы (*сәскестең бер өлөшө*)

**СЕНА́Ж** *м* сенаж (*махсус әҙерләнгән мал аҙығы*)

**СЕНА́Т** *м* **1.** сенат (*Боронғо Римда юғары властың дәүләт органы*; *ҡайһы бер илдәрҙә парламенттағы юғары палата*) **2.** Сенат (*революцияға тиклем Рәсәйҙә юғары хөкөм функцияһын үтәп, хөкүмәт аппараты эшмәкәрлеген күҙәткән орган*)

**СЕНА́ТОР** *м* сенатор (*сенат ағзаһы*)

**СЕНА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое сенатор ...ы; **сена́торская реви́зия** сенатор ревизияһы

**СЕНА́ТОРСТВО** *с* сенаторлыҡ (*сенатор дәрәжәһе*)

**СЕНА́ТСКИЙ,** -ая, -ое сенат ...ы, Сенат ...ы; **сена́тский ука́з** сенат указы

**СЕНБЕРНА́Р** *м* сенбернар (*ҙур кәүҙәле эт тоҡомо*)

**СЕ́НИ** *мн.* солан, өй алды

**СЕННИ́К** *м* **1.** (*матрас, тюфяк*) һалам (бесән) түшәк **2.** (*сеновал*) бесәнлек, бесән һарайы

**СЕННО́Й I** и *уст.* **СЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое бесән ...ы; **сенна́я пыль** бесән саңы; **сенно́й сара́й** бесән һарайы

**СЕННО́Й II** и *уст.* **СЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое солан ...ы, өй алды ...ы; **сенна́я дверь** солан ишеге

**СЕ́НО** *с* бесән; **стог се́на** бесән кәбәне; **коси́ть се́но** бесән сабыу ♦ **(как) соба́ка на се́не** *см.* **соба́ка**

**СЕНОВА́Л** *м* бесәнлек

**СЕНОЕ́ДЫ** *мн.* (*ед.* **сеное́д** *м*); *зоол.* бесән (китап) беттәре (*бөжәктәр*)

**СЕНОЗАГОТОВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бесән әҙерләү ...ы; **сенозаготови́тельные рабо́ты** бесән әҙерләү эштәре; **сенозаготови́тельный сезо́н** бесән әҙерләү мәле

**СЕНОЗАГОТО́ВКИ** *мн.* (*ед.* **сенозагото́вка** *ж*) бесән әҙерләү

**СЕНОЗАГОТО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое бесән әҙерләү ...ы

**СЕНОКО́С** *м* **1.** (*косьба*) бесән сабыу, бесәнгә төшөү **2.** (*время косьбы*) бесән өҫтө, бесән ваҡыты **3.** (*место косьбы*) бесәнлек, сабынлыҡ

**СЕНОКОСИ́ЛКА** *ж* бесән сапҡыс машина

**СЕНОКО́СНЫЙ,** -ая, -ое бесән ...ы, бесән сабыу ...ы; **сеноко́сная пора́** бесән ваҡыты (өҫтө); **сеноко́сный уча́сток** бесән сабыу участкаһы

**СЕНОКОШЕ́НИЕ** *с см.* **сеноко́с** 1

**СЕНОСУШИ́ЛКА** *ж* бесән киптергес (*ҡулайлама*)

**СЕНОУБО́РКА** *ж* бесән йыйыу (күбәләү)

**СЕНОУБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое бесән йыйыу (күбәләү) ...ы; **сеноубо́рочные маши́ны** бесән йыйыу машиналары; **сеноубо́рочные рабо́ты** бесән йыйыу эштәре

**СЕНСАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое сенсациялы, шаҡ ҡатырғыс; **сенсацио́нные но́вости** сенсациялы яңылыҡтар

**СЕНСА́ЦИЯ** *ж* сенсация (**1.** *ниндәйҙер хәл-ваҡиға йәки хәбәрҙең шаҡ ҡатырғыс көслө тәьҫире* **2.** *шундай тәьҫир уятҡан хәл-ваҡиға йәки хәбәр*)

**СЕНСО́РНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* тойоусан, һиҙеүсән

**СЕНСУАЛИ́ЗМ** *м* сенсуализм (*танып белеү теорияһында һиҙемләүҙе ысын белемдең нигеҙе һәм төп формаһы тип таныған йүнәлеш*)

**СЕНСУАЛИ́СТ** *м* сенсуалист

**СЕНСУАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сенсуалистик; **сенсуалисти́ческие взгля́ды** сенсуалистик ҡараштар

**СЕНСУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сенсуаль (*үҙ тойғоңа, үҙ һиҙемләүеңә нигеҙләнгән*); **сенсуа́льный о́пыт** сенсуаль тәжрибә

**СЕНТЕНЦИО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое сентенциялы; **сентенцио́зное выступле́ние** сентенциялы сығыш

**СЕНТЕ́НЦИЯ** *ж* сентенция (*өгөт-нәсихәткә нигеҙләнгән хикмәтле һүҙ*)

**СЕНТИМЕНТАЛИ́ЗМ** *м* **1.** сентиментализм (*XVIII—XIX бб. әҙәбиәтендә һәм сәнғәтендә барлыҡҡа килгән, кешенең уй-хистәрен сағылдырыуға һәм ысынбарлыҡты идеаллаштырыуға ҡоролған ағым*); **францу́зский сентиментали́зм** француз сентиментализмы **2.** *книжн.* (*сентиментальное отношение к чему-л.*) сентименталлек, әҫәрләнеүсәнлек

**СЕНТИМЕНТАЛИ́СТ** *м* сентименталист (*сентиментализм яҡлы кеше*)

**СЕНТИМЕНТА́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** (*проявлять чрезмерную чувствительность*) хискә (тойғоларға) бирелеү **2.** (*проявлять чрезмерную снисходительность к кому-л.*) йомшаҡлыҡ күрһәтеү, сөсөләнеү

**СЕНТИМЕНТА́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** сентименталлек, артыҡ (сиктән тыш) тойғоларға бирелеүсәнлек, әҫәрләнеүсәнлек **2.** *обычно мн.* **сентимента́льности** сөсө һүҙҙәр; **говори́ть сентимента́льности** сөсө һүҙҙәр һөйләү

**СЕНТИМЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сентименталь, сентиментализм ...ы, сентиментализмға нигеҙләнгән; **сентимента́льный рома́н** сентименталь роман **2.** хискә бирелеп барыусан, үтә тойғоло, әҫәрләнеүсән, сентименталь; **сентимента́льный челове́к** хискә бирелеүсән кеше

**СЕНТЯ́БРЬ** *м* сентябрь ♦ **смотре́ть сентябрём** *шутл.* һөмһөрө ҡойолоу

**СЕНТЯ́БРЬСКИЙ,** -ая, -ое сентябрь ...ы; **сентя́брьские дожди́** сентябрь ямғырҙары

**СЕНЬ** *ж*; *трад.-поэт.* **1.** ҡаплам, ышыҡ, күләгә; **в сени́ дере́вьев** ағастар күләгәһендә **2.** япма, түбә; **сень шатра́** ♦ **под се́нью** *чего*: 1) (*под покровом*) ышығында; **под се́нью черёмухи** муйыл ышығында; 2) (*под покровительством*) ҡанаты аҫтында, яҡлауында, ҡурсалауында; **тaíться под се́нью зако́на** закондар яҡлауына боҫоу

**СЕНЬО́Р I** *м* сеньор (*Урта быуатта Көнбайыш Европала: эре ер биләүсе*)

**СЕНЬО́Р II** *м* сеньор (*Испанияла ир-аттың исеме йәки фамилияһы алдынан йөрөгән өндәшеү һүҙе*)

**СЕНЬО́РА** *ж* сеньора (*Испанияла ҡатындарҙың исеме йәки фамилияһы алдынан ҡулланылған өндәшеү һүҙе*)

**СЕНЬОРИ́ТА** *ж* сеньорита (*Испанияла ҡыҙҙарҙың исеме йәки фамилияһы алдынан ҡулланылған өндәшеү һүҙе*)

**СЕПАРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое сепаратив; **сепарати́вный догово́р** сепаратив килешеү

**СЕПАРАТИ́ЗМ** *м* сепаратизм (*үҙенә башҡа айырылыуға, бүленеүгә булған ынтылыш*)

**СЕПАРАТИ́СТ** *м* сепаратист (*сепаратизм яҡлы кеше*)

**СЕПАРАТИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое сепаратистар ...ы, сепаратизм ...ы; **сепарати́стское движе́ние** сепаратизм хәрәкәте

**СЕПАРА́ТНОСТЬ** *ж* сепаратлыҡ; **сепара́тность соглаше́ния** килешеүҙең сепаратлығы

**СЕПАРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое сепаратив, үҙенә айырым торған, башҡалар менән иҫәпләшмәгән; **сепара́тный догово́р** сепаратив килешеү

**СЕПАРА́ТОР** *м* сепаратор (**1.** *ҡатнаш, аралаш нәмәләрҙең бер төрлөһөн икенсеһенән айыра торған төрлө аппарат* **2.** *тех. подшипниктарҙағы шариктарҙы йәки роликтарҙы айырыу өсөн булған уйынтылы обойма*)

**СЕПАРА́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сепаратор ...ы; **сепара́торный цех** сепаратор цехы **2.** һөт айыртыу ...ы; **сепара́торный пункт** һөт айыртыу пункты

**СЕПАРА́ЦИЯ** *ж*; *в разн. знач.* айырылыу, бүленеү; **полити́ческая сепара́ция** сәйәси яҡтан айырылыу; **ме́тод сепара́ции** айырылыу методы

**СЕПАРИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* сепаратор аша үткәреү

**СЕПАРИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сепари́ровать**

**СЕ́ПИЯ** *ж* сепия (**1.** *зоол. тәнендә көрән төҫтәге буяу матдәһе булған диңгеҙ моллюскаһы* **2.** *ошо моллюсканан алынған асыҡ көрән буяу* **3.** *ошо буяу менән эшләнгән һүрәт*)

**СЕ́ПСИС** *м*; *мед.* сепсис, ҡан ағыуланыу

**СЕПТЕ́Т** *м*; *муз.* септет (**1.** *ете тауыш йәки ете инструмент өсөн яҙылған музыка әҫәре* **2.** *ете башҡарыусынан торған ансамбль*)

**СЕ́ПТИМА** *ж*; *муз.* септима (*диатоник гамманың етенсе баҫҡысы*)

**СЕПТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *мед.* септик, сепсис, сереткес, seретә торған; **септи́ческий проце́сс** септик процесс

**СЕ́РА** *ж* **1.** көкөрт (*химик элемент*) **2.** сайыр (*ҡолаҡ эсендә барлыҡҡа килә торған*) **3.** *обл.* һағыҙ, сайыр (*ылыҫлы ағастарҙың йәбешкәк ҡуйы һуты*)

**СЕРА́ЛЬ** *м* **1.** сераль (*Көнсығыш илдәрҙә һарай*); **султа́нский сера́ль** солтан серале **2.** (*гарем*) һәрәм

**СЕРАСКИ́Р** *м* сераскир (*солтан Төркиәһендә баш командующий, һуңынан хәрби министр*)

**СЕРБИЯ́НКА** *ж* сербиянка (*сиған халҡының бейеүе һәм көйө*)

**СЕ́РБСКИЙ,** -ая, -ое серб ...ы; **се́рбский язы́к** серб теле

**СЕ́РБЫ** *мн.* сербтар, серб халҡы // *ед.* **серб** *м* серб ир-аты; **се́рбка** *ж* серб ҡатын-ҡыҙы

**СЕРВА́НТ** *м* сервант (*тәпәшәк буфет*)

**СЕРВИ́З** *м* сервиз (*тулы комплектлы һауыт-һаба*); **столо́вый серви́з** аш сервизы; **ча́йный серви́з** сәй сервизы

**СЕРВИ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое сервиз ...ы; **серви́зный ча́йник** сервиз сәйнүге; **серви́зная ча́шка** сервиз сынаяғы

**СЕРВИРОВА́ТЬ** *сов., несов. что* сервировкалау; **пра́вильно сервирова́ть стол** өҫтәлде дөрөҫ сервировкалау

**СЕРВИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **сервирова́ть 2.** сервировка; **дорога́я сервиро́вка** затлы сервировка

**СЕ́РВИС** *м* сервис (*халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү*)

**СЕРДЕ́ЧНИК I** *м* **1.** *тех.* кендек, үҙәк; **желе́зный серде́чник** тимер үҙәк; **серде́чник электромагни́та** электромагнит кендеге **2.** *бот.* йөрәк үләне

**СЕРДЕ́ЧНИК II** *м*; *разг.* йөрәк ауырыулы кеше **2.** йөрәк ауырыуҙары табибы

**СЕРДЕ́ЧНИЦА** *ж см.* **серде́чник** II 1

**СЕРДЕ́ЧНО** *нареч.* **1.** ысын күңелдән, ихлас; **люби́ть серде́чно** ихлас яратыу **2.** ихлас күңелдән, йылы; **серде́чно встре́тить** йылы ҡабул итеү

**СЕРДЕ́ЧНО-СОСУ́ДИСТЫЙ,** -ая, -ое йөрәк-ҡан тамырҙары ...ы; **серде́чно-сосу́дистые заболева́ния** йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары

**СЕРДЕ́ЧНОСТЬ** *ж* ихласлыҡ, йылылыҡ; **серде́чность встре́чи** осрашыуҙың ихласлығы

**СЕРДЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йөрәк ...ы; **серде́чные мы́шцы** йөрәк мускулдары; **серде́чные заболева́ния** йөрәк ауырыуҙары **2.** (*чуткий, отзывчивый*) шәфҡәтле, йомшаҡ күңелле; **серде́чный челове́к** йомшаҡ күңелле кеше **3.** (*искренний*) ысын йөрәктән (күңелдән) эшләнгән (булған), эскерһеҙ, ихлас; **серде́чная дру́жба** эскерһеҙ дуҫлыҡ **4.** мөхәббәткә (ғишыҡҡа) бәйле, мөхәббәт ...ы; **серде́чная дра́ма** мөхәббәт драмаһы **5.** (*задушевный*) хисле, тулҡынландырғыс; **серде́чная пе́сня** тулҡынландырғыс йыр

**СЕРДИ́ТО** *нареч.* асыу (нәфрәт) менән, асыуланып, нәфрәтләнеп; **серди́то кри́кнуть** асыуланып ҡысҡырып ебәреү

**СЕРДИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** асыулы; **серди́тый челове́к** асыулы кеше; **серди́тый взгляд** асыулы ҡараш **2.** *разг.* көслө, ҡаты; **серди́тый моро́з** ҡаты һыуыҡ ♦ **под серди́тую ру́ку** асыулы сағына тура килеү

**СЕРДИ́ТЬ** *несов. кого-что* асыуландырыу, асыуын килтереү (ҡабартыу)

**СЕРДИ́ТЬСЯ** *несов.* асыу килеү (ҡабарыу), асыуланыу; **серди́ться на сосе́да** күршегә асыу килеү

**СЕРДОБО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мәрхәмәтле, ҡыҙғаныусан, йомшаҡ күңелле; **сердобо́льный челове́к** мәрхәмәтле кеше

**СЕРДОЛИ́К** *м* аҡыҡ

**СЕРДОЛИ́КОВЫЙ,** -ая, -ое аҡыҡ, аҡыҡлы; **сердоли́ковый пе́рстень** аҡыҡ йөҙөк; **сердоли́ковая бро́шка** аҡыҡлы брошка

**СЕ́РДЦЕ** *с* **1.** йөрәк; **се́рдце бьётся** йөрәк һуға; **кровоизлия́ние в се́рдце** йөрәккә ҡан һауыу **2.** *перен.* (*символ чувств, настроений*) күңел, йөрәк, бәғер, бауыр; **от всего́ се́рдца** ысын күңелдән; **в глубине́ се́рдца** йөрәк түрендә; **ка́менное се́рдце** таш бәғер **3.** *перен., разг.* (*гнев, раздражение*) асыу; **сказа́ть с се́рдцем** асыу менән әйтеү **4.** *чего*; *перен.* (*центр, главная часть чего-л.*) бауыр, үҙәк; **се́рдце на́шей респу́блики — Уфа** Өфө — республикабыҙҙың үҙәге ♦ **в сердца́х** асыуланып, асыу менән; **се́рдце не лежи́т** *см.* **лежа́ть**; **отлегло́ от се́рдца** күңел тынысланды; **покори́ть се́рдце** күңелен яулау, үҙенә ҡаратыу; **положа́ (положи́в) ру́ку на́ сердце** асыҡтан-асыҡ, йәшермәйенсә, ысын күңелдән; **приня́ть бли́зко к се́рдцу** *что* күңелгә яҡын алыу; **се́рдце кро́вью облива́ется** йөрәккә ҡан һауа, йөрәк әрней; **се́рдце не на ме́сте** күңел тыныс түгел, йөрәк урынында түгел; **се́рдце замира́ет** йөрәк алҡымға килә; **с замира́нием се́рдца** *см.* **замира́ние**; **се́рдце надрыва́ется** йөрәге ярһый; **се́рдце оборвало́сь (упа́ло)** йөрәге жыу итеп китте; **се́рдце разрыва́ется** йөрәге өҙгөләнә; **се́рдце боли́т** йөрәк һыҙлай; **се́рдце ра́дуется** йәнгә рәхәт; **ложи́ться ка́мнем на се́рдце (ду́шу)** йөрәккә таш булып ятыу; **скрепя́ се́рдце** *см.* **скрепи́ть**; **с лёгким се́рдцем** тыныс күңел менән; **с тяжёлым се́рдцем** ауыр тойғо менән; **ко́шки скребу́т на се́рдце (душе́)** *см.* **скрести́**; **войти́ в се́рдце (ду́шу)** йөрәккә үтеп инеү

**СЕРДЦЕБИЕ́НИЕ** *с* йөрәк тибеү, йөрәк тибеше; **норма́льное сердцебие́ние** ғәҙәттәге йөрәк тибеше

**СЕРДЦЕВЕ́Д** *м* кеше күңелен яҡшы белеүсе (*кеше бауырына инеп барыусы*)

**СЕРДЦЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое йөрәк һымаҡ, йөрәккә оҡшаған, йөрәк рәүешендәге; **сердцеви́дные ли́стья** йөрәк рәүешендәге япраҡтар

**СЕРДЦЕВИ́НА** *ж* **1.** үҙәк; **сердцеви́на де́рева** ағас үҙәге; **сердцеви́на я́блока** алма үҙәге **2.** *чего* ҡап (иң) уртаһы, урта, урталыҡ; **сердцеви́на ме́ли** һай ерҙең ҡап уртаһы **3.** *перен.* булмыш, асыл; **сердцеви́на уче́ния** тәғлимәттең асылы

**СЕРДЦЕВИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҙәк ...ы; **сердцеви́нный слой сте́бля** һабаҡтың үҙәк ҡатламы **2.** мөһим, төп; **сердцеви́нная су́щность** мөһим асылы, төп булмышы

**СЕРДЦЕЕ́Д** *м* и **СЕРДЦЕЕ́ДКА** *ж*; *разг., шутл.* йөрәк яндырыусы, йөрәккә ут һалыусы

**СЕРЕБРЁННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **серебри́ть**

**СЕРЕБРЁНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* көмөш йүгертелгән (ялатылған); **серебрёные ви́лки** көмөш ялатылған сәнскеләр

**СЕРЕБРИ́СТОСТЬ** *ж* көмөш һымаҡ (төҫлө) йылтыр булыу, көмөштәй сафлыҡ; **серебри́стость и́нея** бәҫтең көмөш һымаҡ йылтыр булыуы

**СЕРЕБРИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** көмөш һымаҡ йылтырауыҡлы, көмөш төҫлө, көмөштәй аҡ; **серебри́стый и́ней** көмөш һымаҡ йылтырауыҡлы бәҫ; **серебри́стый свет луны́** айҙың көмөш төҫлө яҡтыһы **2.** сал кергән (төшкән); **серебри́стые во́лосы** сал төшкән сәс **3.** *перен.* көмөштәй саф, сыңлап торған, яңғырауыҡлы (*тауышҡа ҡарата*); **серебри́стый голосо́к** көмөштәй саф тауыш ♦ **серебри́стые облака́** бик бейектәге саҡ-саҡ күренгән болоттар

**СЕРЕБРИ́ТЬ** *несов. что* **1.** (*покрывать слоем серебра*) көмөшләү, көмөш ялатыу (йүгертеү); **серебри́ть ло́жки** ҡалаҡтарға көмөш йүгертеү **2.** *перен.* ағартыу, сал төшөрөү, көмөшләндереү

**СЕРЕБРИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** көмөш төҫлө йылтырау; **снег серебри́тся** ҡар көмөш төҫлө йылтырай **2.** (*виднеться — о чём-л. серебристом*) йылтырап (ағарып) күренеү; **вдали́ серебря́тся верши́ны гор** алыҫта тау түбәләре ағарып күренә **3.** *страд. от* **серебри́ть** 1

**СЕРЕБРО́** *с* **1.** көмөш (*химик элемент, металл*) **2.** *собир.* (*изделия из этого металла*) көмөш (*көмөштән яһалған әйберҙәр*); **столо́вое серебро́** көмөш ҡашығаяҡ **3.** *собир.* (*серебряные монеты*) көмөш тәңкәләр (*аҡса*) **4.** *перен.* көмөштәй, көмөш төҫлө; **вода́ отлива́ет серебро́м** һыу көмөштәй йылтырай **5.** *перен.* (*седина*) аҡ, сал; **во́лосы тро́нуты серебро́м** сәстәренә сал төшкән **6.** *перен.* көмөш (*сыңлап торған нәфис тауыш*)

**СЕРЕБРОПЛАВИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое көмөш иретеү ...ы; **сереброплави́льный заво́д** көмөш иретеү заводы

**СЕРЕ́БРЯНИК** *м* көмөшсө (*көмөш оҫтаһы*)

**СЕРЕ́БРЯНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көмөш ...ы; **сере́бряный сли́ток** көмөш ҡойолмаһы; **сере́бряная руда́** көмөш рудаһы **2.** көмөш; **сере́бряные часы́** көмөш сәғәт **3.** көмөштәй (йылтыр, йылтырап торған); **сере́бряные звёзды** көмөштәй йылтырап торған йондоҙҙар **4.** *перен.* аҡ, сал, аҡ (сал) төшкән; **сере́бряные во́лосы** сал сәстәр **5.** *перен.* сыңлап торған, көмөштәй; **сере́бряный го́лос** сыңлап торған тауыш ♦ **сере́бряная сва́дьба** көмөш туй (*өйләнешеүҙең егерме биш йыллығы*)

**СЕРЕДИ́НА** *ж* урта, урталыҡ, ярты юл; **середи́на ко́мнаты** бүлмәнең уртаһы; **середи́на кру́га** түңәрәктең урталығы; **середи́на ле́та** йәй уртаһы ♦ **золота́я середи́на** *см.* **золото́й**; **середи́на на полови́ну** ни яҡшы ни яман түгел; алып маҡтарлыҡ, һалып тапарлыҡ түгел

**СЕРЕДИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** урталағы, урталыҡтағы; **середи́нное окно́** урталағы тәҙрә **2.** ике-

ле-микеле, ярты-йорто, ярым-ярты; **серединное мнение** икеле-микеле фекер; **серединное решение** ярым-ярты ҡарар

**СЕРЕДНЯ́К** *м* **1.** *разг.* (*человек средних способностей*) урта ҡул кеше **2.** *ист.* урта хәлле крәҫтиән

**СЕРЕДНЯ́ЦКИЙ,** -ая, -ое урта хәлле крәҫтиән ...ы; **середня́цкое хозя́йство** урта хәлле крәҫтиән хужалығы

**СЕРЁЖКА** *ж* **1.** *см.* **серьга́** 1; **2.** алҡа сәскә, һырға; **серёжки берёзы** ҡайын һырғалары

**СЕРЕНА́ДА** *ж* серенада (**1.** *Урта быуатта Италияла һәм Испанияла һөйгән ҡатын-ҡыҙға арнап йырланған йыр* **2.** *инструменталь ансамбль өсөн яҙылған сюита тибындағы музыкаль әҫәр*)

**СЕРЕ́ТЬ** *несов.* **1.** буҙарыу, һорғолтланыу, ҡараңғыланыу, ҡарайыу, һөрөнкөләнеү, һоро төҫкә инеү; **не́бо на́чало сере́ть** күк йөҙө буҙара башланы **2.** (*выделяться, виднеться — о чём-л. сером*) буҙарып (һорғолтланып) күренеү

**СЕРЖА́НТ** *м* сержант (*кесе командир дәрәжәһе, шул дәрәжәләге хәрби кеше*)

**СЕРЖА́НТСКИЙ,** -ая, -ое сержант(тар) ...ы; **сержа́нтский соста́в** сержанттар составы

**СЕРИ́ЙНОСТЬ** *ж* сериялылыҡ, сериялы булыу; **сери́йность произво́дства** етештереүҙең сериялылығы

**СЕРИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое сериялы, серия ...ы; **сери́йный вы́пуск** сериялы сығарылыш; **сери́йный но́мер** серия номеры

**СЕ́РИЯ** *ж*; *в разн. знач.* серия; **се́рия книг** китаптар серияһы; **кинофи́льм в трёх се́риях** өс сериялы кинофильм; **се́рия па́спорта** паспорттың серияһы

**СЕРМЯ́ГА** *ж ист.* **1.** (*домотканое грубое некрашеное сукно*) тула; **бе́лая сермя́га** аҡ тула **2.** (*одежда из такого сукна*) тула сәкмән

**СЕРМЯ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое тула; **сермя́жный кафта́н** тула сәкмән

**СЕ́РНА** *ж* тау кәзәһе

**СЕРНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** көкөртлө; **серни́стые удобре́ния** көкөртлө ашламалар; **серни́стый исто́чник** көкөртлө шишмә **2.** *хим.* көкөрт ...ы, көкөртлө; **серни́стая кислота́** көкөрт кислотаһы

**СЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое көкөртлө, көкөрт ...ы; **се́рный колчеда́н** көкөртлө колчедан; **се́рные ва́нны** көкөртлө ванналар; **се́рные за́лежи** көкөрт ятҡылыҡтары

**СЕРОВОДОРО́Д** *м* сероводород, көкөртлө водород

**СЕРОВОДОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое сероводород ...ы, сероводородлы, көкөртлө водород ...ы; **сероводоро́дные родники́** сероводородлы шишмәләр

**СЕРОГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое һоро күҙле; **серогла́зая де́вушка** һоро күҙле ҡыҙ

**СЕРОЗЁМ** *м* һоро тупраҡ; **серозёмы Сре́дней А́зии** Урта Азияның һоро тупрағы

**СЕРОТЕРАПИ́Я** *ж*; *мед.* серотерапия (*кешеләрҙе, хайуандарҙы сыворотка менән дауалау*)

**СЕРОУГЛЕРО́Д** *м* сероуглерод, көкөртлө углерод (*тиҙ тоҡаныусан, һаҫыҡ еҫле ағыулы шыйыҡса*)

**СЕРП** *м* ураҡ; **ле́звие серпа́** ураҡ йөҙө; **руко́ятка серпа́** ураҡ һабы; **зубцы́ серпа́** ураҡ тештәре; **зубри́ть серп** ураҡ тешәү ♦ **серп луны́** айҙың урағы (*айҙың ураҡ рәүешендә күренгән мәле*); **серп и мо́лот** ураҡ менән сүкеш (*эшселәр менән крәҫтиәндәр дуҫлығын, тыныс хеҙмәтте сағылдырыусы элекке СССР дәүләт эмблемаһы*)

**СЕРПАНТИ́Н** *м* серпантин (**1.** *төрлө төҫтәге ҡағыҙ таҫма* **2.** *бормалы-бормалы текә тау юлы*)

**СЕРПОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое ураҡ рәүешле, ураҡ һымаҡ; **серпови́дные рога́** ураҡ рәүешле мөгөҙҙәр

**СЕРПОВИ́ЩЕ** *с* ураҡ һабы

**СЕРПООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое ураҡ рәүешле (рәүешендәге), ураҡ формаһындағы

**СЕРПЯ́НКА** *ж* серпянка (*һирәк итеп һуғылған йоҡа ғына туҡыма*); **голуба́я серпя́нка** зәңгәр серпянка

**СЕРПЯ́НКОВЫЙ,** -ая, -ое серпянка; **серпя́нковая блу́за** серпянка блуза

**СЕРСО́** *с нескл.* серсо (*ҡоршау атып уйнау*); **игра́ть в серсо́** серсо уйнау

**СЕРТИФИКА́Т** *м* сертификат (**1.** *таныҡлыҡ яҙыуы* **2.** *тышҡы сауҙала*: *тауарҙың сорты, ассортименты, хаҡы яҙылған ҡағыҙ* **3.** *махсус дәүләт заемдары облигацияларының исеме*)

**СЕ́РЫЙ,** -ая, -ое **1.** һоро, көл төҫлө; **се́рые глаза́** һоро күҙҙәр; **се́рый волк** һоро бүре; **се́рые ту́чи** һоро болоттар **2.** (*пасмурный*) болотло, йонсоу; **се́рый день** йонсоу көн **3.** *перен.* (*ничем не примечательный*) уртаса, урта ҡул, күренекһеҙ; **се́рый рома́н** уртаса роман; **се́рая жизнь** күренекһеҙ тормош **4.** *перен.*, *разг.* (*необразованный, малокультурный*) наҙан, ҡара, уҡымаған; **се́рый челове́к** уҡымаған кеше

**СЕРЬГА́** *ж* **1.** һырға, алҡа; **золота́я серьга́** алтын алҡа; **носи́ть се́рьги** алҡа тағыу **2.** *тех.* ҡуласа (*тоташтырыусы деталь*)

**СЕРЬЁЗНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* етди булып ҡыланыу (күренергә маташыу), етдиләнеп маташыу

**СЕРЬЁЗНО** *нареч.* **1.** етди (рәүештә), төплө; **серьёзно взя́ться за рабо́ту** эшкә етди тотоноу; **серьёзно говори́ть** етди һөйләшеү **2.** (*не шутя*) ныҡлап, ысынлап, шаярыуһыҙ-ниһеҙ; **серьёзно обеща́ть** ысынлап вәғәҙә итеү **3.** ҡаты итеп, бик ныҡ; **серьёзно заболе́ть** бик ныҡ ауырыу **4.** *в знач. вводн. сл.*; *разг.* (*в самом деле*) ысын, ысынлап та; **серьёзно, пойдёшь в кино́?** ысынлап, киноға бараһыңмы?

**СЕРЬЁЗНОСТЬ** *ж* етдилек, төплөлөк, киҫкенлек; **серьёзность разгово́ра** һөйләшеүҙең етдилеге; **серьёзность положе́ния** хәлдең киҫкенлеге

**СЕРЬЁЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** етди, төплө; **серьёзное отноше́ние к рабо́те** эшкә етди ҡараш; **серьёзная бесе́да** етди әңгәмә **2.** тәрән йөкмәткеле, бай; **серьёзный репертуа́р** бай репертуар; **серьёзная кни́га** тәрән йөкмәткеле китап **3.** саф, эскерһеҙ, хәйләһеҙ, ысын; **серьёзные чу́вства** эскерһеҙ тойғолар **4.** борсоулы, уйсан; **серьёзный взгляд** уйсан ҡараш **5.** мөһим, хәл иткес, ҙур; **серьёзная подде́ржка** мөһим ярҙам; **серьёзные тру́дности** ҙур ҡыйынлыҡтар **6.** ҡурҡыныс, хәүефле, етди; **серьёзный проти́вник** ҡурҡыныс дошман; **серьёзная опера́ция** хәүефле операция; **серьёзная боле́знь** ҡурҡыныс ауырыу

**СЕССИО́ННЫЙ,** -ая, -ое сессия(лар) ...ы; **сессио́нный ме́сяц** сессия айы; **сессио́нный зал** сессиялар залы

**СЕ́ССИЯ** *ж*; *в разн. знач.* сессия; **се́ссия Госуда́рственного собра́ния РБ** БР Дәүләт йыйылышы сессияһы; **экзаменацио́нная се́ссия** имтихандар сессияһы

**СЕСТРА́** *ж* **1.** (*старшая*) апай; (*младшая*) һеңле, ҡарендәш; **родна́я сестра́** бер туған апай **2.** (*медицинская*) медсестра, шәфҡәт туташы ♦ **сестра́ милосе́рдия** шәфҡәт туташы

**СЕСТРЁНКА** *ж*; *разг.*, *уменьш.-ласк. от* **сестра́** 1; **2.** (*в обращении*) һеңлекәш, һылыу, ҡарендәш

**СЕСТЬ** *сов.* **1.** ултырыу, сүкәйеү; **сесть на дива́н** диванға ултырыу; **сесть за стол** өҫтәл артына ултырыу **2.** *за что*, *на что* и *с неопр.* ултырыу, керешеү, тотоноу; **сесть за кни́жку** китап уҡырға тотоноу; **сесть за рабо́ту** эшкә тотоноу **3.** (*о птице*, *насекомом*) ҡуныу, ултырыу, төшөү; **у́тки се́ли на о́зеро** өйрәктәр күлгә төштө **4.** (*приземлиться*) ултырыу, төшөү; **самолёт сел на аэродро́м** самолёт аэродромға төштө **5.** (*попасть в заключение*) ултырыу, тотҡонлоҡта булыу; **сесть в тюрьму́** төрмәгә ултырыу **6.** (*опуститься за горизонт*) байыу; **со́лнце се́ло** ҡояш байыны **7.** (*осесть*) ҡуныу; **пыль се́ла на подоко́нник** туҙан тәҙрә төптәренә ҡунған **8.** (*углубиться в землю*) сүгеү, баҫылыу, ултырыу; **дом сел** өй баҫылған **9.** (*укоротиться*, *сузиться — о ткани*, *коже*) ултырыу; **руба́шка се́ла** күлдәк ултырҙы ♦ **сесть в кало́шу** *см.* **кало́ша**; **сесть верхо́м**; **сесть на́ голову** башына (елкәһенә) менеү; **сесть на ше́ю** *см.* **ше́я**; **сесть не в свои́ са́ни** ҡулдан килмәгәнгә тотоноу, килешмәгәнде эшләү; **сесть на мель** кәмә ҡомға терәлеү; **сесть за решётку** төрмәгә ултырыу; **сесть на я́йца** себеш сығарырға ултырыу

**СЕТ** *м*; *спорт.* сет (*теннисчылар ярышындағы бер партия уйын*)

**СЕТЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** ау, йылым; **сетево́е плете́ние** ау үреү **2.** ау ...ы, йылым ...ы; **сетево́й про́мысел** ау промыслаһы **3.** сеть ...ы, селтәр ...ы; **сетево́й руби́льник** сеть рубильнигы

**СЕТЕВЯЗА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ау бәйләй торған; **сетевяза́льная маши́на** ау бәйләй торған машина

**СЕ́ТКА** *ж* **1.** бәләкәй ау (йылым) **2.** (*приспособление*) сетка, селтәр; (*для защиты от пчёл*) битлек, күҙлек; **волейбо́льная се́тка** волейбол селтәре; **се́тка пчеловóда** умартасы битлеге **3.** *разг.* (*сумка для мелких вещей*) сетка (*ептән-бауҙан үрелгән моҡсай*) **4.** *спец.* (*расписание*, *шкала*, *схема*) сетка; **тари́фная се́тка** тариф сеткаһы **5.** *анат.* бәләкәй ҡарын

**СЕ́ТОВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **се́товать 2.** (*жалоба*) ялыу, шикәйәт

**СЕ́ТОВАТЬ** *несов.* **1.** (*сожалеть*) ҡайғырыу, хәсрәтләнеү, бошоноу, көйөү; **напра́сно се́товать** бушҡа бошоноу **2.** (*жаловаться*) зарланыу, һуҡраныу; **се́товать на жизнь** тормошҡа зарланыу

**СЕ́ТТЕР** *м* сеттер (*оҙон йөнлө һунар эте*)

**СЕТЧА́ТКА** *ж*; *анат.* селтәрле шекәрә (*күҙҙәге*)

**СЕТЧАТОКРЫ́ЛЫЕ** *мн.*; *зоол.* селтәр ҡанатлылар

**СЕ́ТЧАТЫЙ,** -ая, -ое селтәр һымаҡ, селтәрле, селтәр ҡуйылған; **се́тчатый узо́р** селтәр биҙәк; **се́тчатый черпа́к** селтәрле сүмес

**СЕТЬ** *ж* **1.** (*приспособление*) ау, йылым; **вяза́ть сеть** йылым бәйләү; **заки́нуть сеть** ау һалыу **2.** селтәр, сетка; **се́ть для лу́ка** һуған селтәре **3.** (*совокупность каких-л. путей*, *каналов и т.д.*) селтәр; **железнодоро́жная сеть** тимер юл селтәре; **телефо́нная сеть** телефон селтәре **4.** *перен.* (*система учреждений*, *предприятий*) селтәр; **торго́вая сеть** сауҙа селтәре; **сеть лече́бных учрежде́ний** дауалау учреждениелары селтәре ♦ **пойма́ть в свои́ се́ти** тоҙаҡҡа эләктереү, ауға төшөрөү; **попа́сть в се́ти**: 1) ғашиҡ булыу; 2) ҡармағына эләгеү, тоҙағына төшөү; **расставля́ть се́ти** *кому-л.* *кемгәлер* тоҙаҡ ҡороу

**СЕЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сечь 2.** (*поверхность*) киҫелеш, киҫем; **попере́чное сече́ние** арҡыры киҫелеш; **пло́щадь сече́ния** киҫем майҙаны

**СЕ́ЧЕНЫЙ,** -ая, -ое ҡыйылған, киҫелгән, сабылған; **се́ченая ра́на** киҫелгән яра

**СЕ́ЧКА** *ж* **1.** *спец.* *см.* **сечь** 3; **се́чка ка́мня** таш киҫеү **2.** (*тяпка*) сапҡыс **3.** (*дроблёная крупа*) ваҡланған ярма; **гре́чневая се́чка** ваҡланған ҡарабойҙай ярмаһы **4.** (*солома с отрубями*) болғатма, бутама (*мал аҙығы*); **корми́ть се́чкой** болғатма ашатыу

**СЕЧЬ** *несов.* **1.** *кого-что* турау, тураҡлау, киҫеү, сабыу, ҡырҡыу; **сечь капу́сту** кәбеҫтә сабыу **2.** *что* ҡыйып (киҫеп) төшөрөү, сабыу; **сечь мечо́м** ҡылыс менән сабыу **3.** *что*; *спец.* киҫеү, шымартыу, шымартып (соҡоп) эшләү (*мәҫ.*, *ташты*) **4.** *кого* (*бить*) сыбыҡлау, һуҡтырыу, һыҙырыу

**СЕ́ЯЛКА** *ж* сәскес (*сәсеү машинаһы*)

**СЕ́ЯЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое сәскес, сәсеү ...ы; **се́ялочные агрега́ты** сәсеү агрегаттары

**СЕ́ЯЛЬЩИК** *м* и **СЕ́ЯЛЬЩИЦА** *ж* **1.** (иген) сәсеүсе; **рабо́тать се́яльщиком** сәсеүсе булып эшләү **2.** (*занимающийся просеиванием чего-л.*) иләүсе; **се́яльщик шла́ка** шлак иләүсе

**СЕ́ЯНЕЦ** *м* сәсмәлек (*орлоҡтан үҫтерелгән бер йәки ике йыллыҡ ағас йәки үҫемлек*); **се́янец я́блони** алмағас сәсмәлеге; **лук-се́янец** һуған сәсмәлеге

**СЕ́ЯНКА** *ж*; *разг.* аҡ (ваҡ) он, иләнгән он; **пшени́чная се́янка** иләнгән бойҙай оно

**СЕ́ЯНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иләнгән; **се́яная мука́** иләнгән он **2.** иләнгән ондан бешерелгән; **се́яный хлеб** иләнгән ондан бешерелгән икмәк **3.** (*посеянный*) сәселгән, сәсеп үҫтерелгән; **се́яные тра́вы** сәселгән үләндәр

**СЕ́ЯТЕЛЬ** *м*; *уст.*, *высок.* **1.** сәсеүсе, ашлыҡ сәсеүсе **2.** *чего*; *перен.*, *книжн.* таратыусы; **се́ятель зна́ний** белем таратыусы

**СЕ́ЯТЬ** *несов. что* **1.** сәсеү; **се́ять пшени́цу** бойҙай сәсеү **2.** *перен.* (*распространять среди людей*) таратыу; **се́ять слу́хи** һүҙ таратыу; **се́ять добро́** яҡшылыҡ таратыу **3.** *см.* **се́яться** 2; **се́ет холо́дный дождь** һалҡын ямғыр ултырып яуа **4.** иләү; **се́ять муку́** он иләү

**СЕ́ЯТЬСЯ** *несов.* **1.** орлоғо ҡойолоу, орлоғо ергә төшөү **2.** яуыу; **на́чал се́яться ме́лкий дождь** ваҡ ямғыр яуа башланы **3.** *разг.* (*сыпаться — о сыпучих предметах*) ҡойолоу, түгелеү **4.** *страд. от* **се́ять** 1, 2, 4

**СЖА́ЛИТЬСЯ** *сов. над кем* и *без доп.* ҡыҙғаныу, аяу, йәлләү; **сжа́литься над ребёнком** баланы йәлләү

**СЖА́ТИЕ** *с см.* **сжать** I, **сжа́ться** 1, 4, 5

**СЖА́ТО** *нареч.* ҡыҫҡаса, ҡыҫҡа итеп; **писа́ть сжа́то** ҡыҫҡаса яҙыу

**СЖА́ТОСТЬ** *ж* **1.** тығыҙлыҡ; **сжа́тость га́за** газдың тығыҙлығы **2.** ҡыҫҡалыҡ; **сжа́тость изложе́ния** яҙыуҙың (һөйләүҙең) ҡыҫҡалығы

**СЖА́ТЫЙ I,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сжать** I; **2.** *прил.* ҡыҫылған, тығыҙландырылған; **сжа́тый во́здух** ҡыҫылған һауа **3.** *прил.* ҡыҫҡа, ҡыҫҡартылған; **сжа́тые сро́ки** ҡыҫҡа ваҡыт

**СЖА́ТЫЙ II,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сжать** II; **2.** *прил.* урылған, урып алынған; **сжа́тая рожь** урып алынған арыш; **сжа́тое по́ле** урылған баҫыу

**СЖАТЬ I** *сов. что* **1.** ҡыҫыу, һығыу, баҫыу; **сжать пружи́ну** пружинаны ҡыҫыу; **сжать ру́ку** ҡулды ҡыҫыу **2.** *прям.*, *перен.* ҡыҫыу, баҫыу; **сжать грудь** күкрәкте ҡыҫыу; **страх сжал ду́шу** ҡурҡыу күңелде ҡыҫты **3.** йомоу, ҡымтыу, төйнәү, ҡыҫыу; **сжать кула́к** йоҙроҡ төйнәү; **сжать гу́бы** ирендәрҙе ҡымтыу; **сжать зу́бы** тештәрҙе ҡыҫыу

**СЖАТЬ II** *сов. что* урып алыу, урыу; **сжать пшени́цу** бойҙайҙы урып алыу

**СЖА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡыҫылыу, һығылыу; **пружи́на сжа́лась** пружина ҡыҫылды **2.** бөршәйеү, йомарланыу, шомрайыу; **сжа́ться от бо́ли** ауыртыуҙан бөршәйеү **3.** ҡыҫылыу, йомолоу, төйнәлеү, ҡымтылыу; **гу́бы сжа́лись** ирендәр ҡымтылды **4.** (*стесниться — о груди*) ҡыҫылыу; (о *горле*) быулығыу; **се́рдце сжа́лось** йөрәк ҡыҫылды **5.** *перен.* әрнеү, һыҡрау, һыҙлау; **душа́ сжа́лась от тоски́** һағыштан күңел һыҙланы

**СЖЕВА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* сәйнәп (ашап) бөтөрөү, сәйнәп йотоу, сәйнәү; **коро́ва сжева́ла се́но** һыйыр бесәнде сәйнәп йотто

**СЖЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **сжева́ть**

**СЖЕЧЬ** *сов. что* **1.** яндырыу, үртәү, ут (үрт) һалыу; **сжечь соло́му** һаламды үртәү **2.** (*израсходовать на отопление и т.п.*) яғып (яндырып) бөтөү; **сжечь кубоме́тр дров** бер кубометр утын яғып бөтөү **3.** (*иссушить солнечным зноем — о растениях*) көйҙөрөү, яндырыу; **сжечь траву́** үләнде көйҙөрөү **4.** *разг.* (*сильно обжечь*) бешереү, яндырыу; **сжечь ру́ку о две́рцу пе́чи** мейес япмаһына ҡулды бешереү **5.** (*испортить жаром, перегревом*) көйҙөрөү, яндырыу; **сжечь пироги́** бәлештәрҙе көйҙөрөү

**СЖЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** яныу, бешеү **2.** *разг.* (*получить солнечные ожоги*) көнгә (ҡояшҡа) бешеү (яныу)

**СЖИВА́ТЬ** *несов. см.* **сжить**

**СЖИВА́ТЬСЯ I** *несов. см.* **сжи́ться**

**СЖИВА́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **сжива́ть**

**СЖИГА́ТЬ** *несов. см.* **сжечь**

**СЖИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сже́чься 2.** *страд. от* **сжига́ть**

**СЖИДИ́ТЬ** *сов. что*; *спец.* шыйыҡландырыу, шыйыҡлау; **сжиди́ть газ** газды шыйыҡландырыу

**СЖИДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *спец.* шыйыҡланыу

**СЖИЖА́ТЬ** *несов. см.* **сжиди́ть**

**СЖИЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сжиди́ться 2.** *страд. от* **сжижа́ть**

**СЖИ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* **1.** *прич. от* **сжиди́ть 2.** *прил.* шыйыҡландырылған; **сжи́женный газ** шыйыҡландырылған газ

**СЖИМ** *м* ҡыҫҡыс (*ҡыҫа торған ҡулайлама*)

**СЖИМА́ЕМОСТЬ** *ж* ҡыҫылыусанлыҡ, ҡыҫылыу; **сжима́емость во́здуха** һауаның ҡыҫылыусанлығы

**СЖИМА́ТЬ** *несов. см.* **сжать** I

**СЖИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сжа́ться 2.** *страд. от* **сжима́ть**

**СЖИНА́ТЬ** *несов. см.* **сжать** II

**СЖИНА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **сжина́ть**

**СЖИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* (*не дать нормально жить*) көн күрһәтмәү, китергә мәжбүр итеү, сығарып ебәреү ♦ **сжить со́ света** *см.* **свет** II

**СЖИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** *с кем* эйәләшеп (күнегеп) китеү, эҫенеп китеү; **сжи́ться с но́выми друзья́ми** яңы дуҫтарға эйәләшеп китеү **2.** *с чем* (*привыкнуть*) күнегеп (өйрәнеп) китеү, күнегеү, өйрәнеү

**СЖУ́ЛЬНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* алдашыу, хәрәмләшеү

**СЗА́ДИ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* арттан, арт яҡтан; **подойти́ сза́ди** арттан килеү **2.** *предлог с род. п.* артта, артында; **сза́ди до́ма** өйҙөң артында

**СЗЫВА́ТЬ** *несов. см.* **созва́ть**

**СЗЫВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **сзыва́ть**

**СИ** *с нескл.*; *муз.* си (*музыка гаммаһының етенсе нотаһы*)

**СИБАРИ́Т** *м* и **СИБАРИ́ТКА** *ж* сибарит (*кәйеф-сафаны ғына яратҡан кеше*)

**СИБИ́РСКИЙ,** -ая, -ое Себер ...ы; **сиби́рские леса** Себер урманы ♦ **сиби́рская ко́шка** себер бесәйе (*оҙон йөнлө йөнтәҫ ҡойроҡло бесәй төрө*); **сиби́рская я́зва** түләмә (*хайуандарҙа, кешеләрҙә була торған үтә йоғошло ауырыу*)

**СИБИРЯКИ́** *мн.* (*ед.* **сибиря́к** *м* и **сибиря́чка** *ж*) Себер кешеләре, Себерҙә йәшәүселәр

**СИВЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* салланыу, ағарыу, сал кереү

**СИ́ВКА** *м* и *ж* и **СИВКО́** *м*; *разг.* күк ат

**СИВОБОРО́ДЫЙ,** -ая, -ое *разг.* сал (аҡ) һаҡаллы; **сивоборо́дый стари́к** сал һаҡаллы ҡарт

**СИВОГРИ́ВЫЙ,** -ая, -ое күк яллы; **сивогри́вая ло́шадь** күк яллы ат

**СИВОДУ́ШКА** *ж* (*помесь чёрно-бурой и рыжей лисицы*) күгелйем (күк) төлкө

**СИВУ́ХА** *ж* сивуха (*таҙартылмаған араҡы*)

**СИВУ́Ч** *м* сивуч (*колаҡлы тюлендәр ғаиләһенә ҡараған һөтимәр диңгеҙ хайуаны*)

**СИВУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое сивуха ...ы; **сиву́шный за́пах** сивуха еҫе

**СИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о масти лошади*) күк, күгелйем; **си́вый конь** күк ат **2.** *разг.* (*седой*) сал, аҡ, сал төшкән; **си́вая борода́** сал һаҡал

**СИГ** *м* алабалыҡ, сиг (*һөмбаштар ғаиләһенә ҡараған төньяҡ диңгеҙ балығы*)

**СИГА́РА** *ж* сигара; **кури́ть сига́ру** сигара тартыу

**СИГАРЕ́ТА** *ж* сигарет; **сигаре́та без фи́льтра** фильтрһыҙ сигарет

**СИГАРЕ́ТНИЦА** *ж* сигарет ҡумтаһы

**СИГАРЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое сигарет ...ы; **сигаре́тный оку́рок** сигарет төпсөгө

**СИГА́РНЫЙ,** -ая, -ое сигара ...ы; **сига́рный за́пах** сигара еҫе

**СИГА́РОЧНИЦА** *ж* сигара ҡумтаһы

**СИГНА́Л** *м* **1.** сигнал (*шартлы белдереү*); **звуково́й сигна́л** тауыш сигналы; **светово́й сигна́л** яҡтылыҡ сигналы; **дать сигна́л** сигнал биреү **2.** *перен.* (*предупреждение*) иҫкәртеү, хәбәр итеү, белдереү; **сигна́лы с мест** урындан алынған иҫкәртеүҙәр

**СИГНАЛИЗА́ТОР** *м* сигнализатор (*сигнал бирә торған прибор*); **автомати́ческий сигнализа́тор** автоматик сигнализатор; **пожа́рный сигнализа́тор** янғын сигнализаторы

**СИГНАЛИЗАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое сигнал бирә торған; **сигнализацио́нный флажо́к** сигнал бирә торған бәләкәй флаг

**СИГНАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **сигнализи́ровать 2.** *в разн. знач.* сигнализация; **пожа́рная сигнализа́ция** янғын сигнализацияһы; **поста́вить сигнализа́цию** сигнализация ҡуйыу; **сигнализа́ция не рабо́тает** сигнализация эшләмәй

**СИГНАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* **1.** сигнал биреү; **сигнализи́ровать фла́гом** флаг менән сигнал биреү **2.** *перен.* (*предупредить*) алдан иҫкәртеп (киҫәтеп, хәбәр итеп) ҡуйыу, сигнал биреү

**СИГНАЛИ́СТ** *м* сигналсы (*сигнал биреүсе*)

**СИГНА́ЛИТЬ** *несов. см.* **сигнализи́ровать** 1

**СИГНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сигнал ...ы; **сигна́льные зна́ки** сигнал тамғалары; **сигна́льные ла́мпочки** сигнал лампочкалары ♦ **сигна́льный экземпля́р** *полигр.* сигнал экземпляры (*баҫманың донъяға сығарылға әҙерләнгән тәүге данаһы*)

**СИГНА́ЛЬЩИК** *м* сигналсы (*сигнал биреүсе*)

**СИГНАТУ́РА** *ж* сигнатура (**1.** *фарм.* аптеканан дарыу менән бергә бирелә торған рецепт күсермәһе **2.** *полигр.* һәр баҫма табаҡтың беренсе һәм өсөнсө биттәрендәге һаны)

**СИГНАТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое *фарм.*, *полигр.* сигнатура ...ы; **сигнату́рный ярлы́к** сигнатура ярлығы

**СИГО́ВЫЙ,** -ая, -ое алабалыҡ ...ы, сиг ...ы; **сиго́вая икра́** алабалыҡ ыуылдырығы

**СИДЕ́ЛКА** *ж* ауырыуҙы ҡараусы (бағыусы)

**СИДЕ́НИЕ** и **СИДЕ́НЬЕ** *с* **1.** *см.* **сиде́ть** 1–8; **сиде́ние без де́ла** эшһеҙ ултырыу; **сиде́ние на дие́те** диетала ултырыу **2.** төп, ултырыу урыны; **стул с ко́жаным сиде́ньем** күнле төплө ултырғыс

**СИДЕ́ТЬ** *несов.* **1.** ултырыу; **сиде́ть на сту́ле** ултырғыста ултырыу; **сиде́ть у огня́** ут эргәһендә ултырыу; **сиде́ть в седле́** эйәрҙә ултырыу; **пчела́ сиди́т на цветке́** бал ҡорто сәскәлә ултыра **2.** һалыу, төшөү (*тап һ.б. нәмәләр*); **на глазу́ сиде́ло бельмо́** күҙгә аҡ һалған **3.** булышыу, шөғөлләнеү, ултырыу; **сиде́ть над чертежа́ми** һыҙмалар менән булышыу; **сиде́ть за кни́гой** китап уҡып ултырыу **4.** *кем*; *разг.* (*занимать место, должность*) ултырыу, урын (вазифа) биләү **5.** булыу, ултырыу; **сиде́ть до́ма** өйҙә булыу; **сиде́ть на со́лнце** ҡояшта ултырыу; **сиде́ть в оса́де** ҡамауҙа ултырыу **6.** биктә булыу, ултырыу; **сиде́ть в тюрьме́** төрмәлә ултырыу **7.** (*ограничиваться чем-л.*) ултырыу, сикләнеү; **сиде́ть на дие́те** диетала ултырыу; **сиде́ть на пайке́** паёкта ултырыу **8.** *без чего*; *разг.* булыу, ултырыу; **сиде́ть без де́нег** аҡсаһыҙ ултырыу; **сиде́ть без дров** утынһыҙ булыу; **сиде́ть без де́ла** эшһеҙ ултырыу **9.** батыу, ултырыу, терәлеү; **ло́дка глубоко́ сиде́ла в воде́** кәмә һыуға батып ултыра **10.** (*об одежде*) килешеп (ултырып) тороу; **костю́м на нём хорошо́ сиди́т** костюм уға килешеп тора ♦ **сиде́ть гвоздём в голове́ (в мозгу́)** *см.* **гвоздь**; **сиде́ть как на иго́лках** *см.* **иго́лка**; **сиде́ть мешко́м** *см.* **мешо́к**; **сиде́ть на чемода́нах** *см.* **чемода́н**; **сиде́ть на ше́е** *см.* **ше́я**; **сиде́ть на я́йцах** йомортҡа баҫып ултырыу, бала сығарыу (*ҡоштарға ҡарата*); **сиде́ть сложа́ ру́ки** *см.* **сложи́ть**; **си́днем сиде́ть** тормай (баҫылып) ултырыу

**СИДЕ́ТЬСЯ** *несов. кому безл.* (*обычно с отрицанием*) ултыра алыу, түҙеп сыҙап ултырыу, ултырып сыҙамау; **(ему́) не сиди́тся на сту́ле** ул ултырғыста ултырып сыҙамай

**СИДЯ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** ултырған, ултырып торған; **сидя́чая пти́ца** ултырған ҡош **2.** хәрәкәтһеҙ, әҙ хәрәкәтләнеүсән, ултырып эшләй торған; **сидя́чая рабо́та** ултырып эшләй торған эш **3.** ултырыу өсөн тәғәйенләнгән; **сидя́чие места́** ултырыу өсөн тәғәйенләнгән урындар ♦ **сидя́чие живо́тные** *зоол.* ултыраҡ хайуандар (*диңгеҙ төптәрендә һыу аҫтарындағы ҡаяларға йәбешеп бер урында ҡуҙғалмай йәшәй торған тереклектәр — коралдар, полиптар һ.б.*)

**СИЁ** *с мест. см.* **сей**

**СИЕНИ́Т** *м* сиенит (*ал, ҡыҙыл, һоро төҫтәге кристаллик тау тоҡомо*)

**СИЕНИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** сиенитлы, сиениты булған; **сиени́товый масси́в** сиенитлы массив **2.** сиенит, сиениттан эшләнгән; **сиени́товая облицо́вка** сиенит йөҙлөк

**СИЕ́НСКИЙ: сие́нская земля́** ҡуйы һары буяу (*һынлы сәнғәттә ҡулланыла*)

**СИЗИ́ФОВ: сизи́фов труд** файҙаһыҙға (бушҡа) түгелгән көс

**СИЗОВОРО́НКА** *ж* күк ҡарға

**СИЗОКРЫ́ЛЫЙ,** -ая, -ое күк (күгелйем) ҡанатлы; **сизокры́лый го́лубь** күк ҡанатлы күгәрсен

**СИ́ЗЫЙ,** -ая, -ое буҙ, күгелйем, ҡарағусҡыл күк, күк, күкһел; **си́зый го́лубь** күк күгәрсен; **си́зый тума́н** күкһел томан

**СИККАТИ́В** *м*; *спец.* сиккатив (*май, буяу һәм лактарҙың кибеүен тиҙләтә торған матдә*)

**СИКОМО́Р** *м* сикомор (*көньяҡта үҫкән емеш ағасы*)

**СИ́ЛА** *ж* **1.** көс, ғәйрәт, ҡеүәт, хәл, ҡеүәт, дарман; **физи́ческая си́ла** физик көс; **лиши́ться сил** хәлдән тайыу; **применя́ть си́лу** көс ҡулланыу; **набра́ться сил** көс туплау **2.** һәләт, көс (*рухи мөмкинлек*); **у́мственная си́ла** аҡыл һәләте; **душе́вные си́лы** рухи көстәр; **си́ла во́ли** ихтыяр көсө **3.** (*энергия, мощность*) ҡеүәт, көс; **центробе́жная си́ла** үҙәктән ҡасыусы көс; **си́ла то́ка** ток көсө **4.** көс, асыл, ҡеүә (*нимәнеңдер булмышы*); **си́ла челове́ка в его́ му́дрости** кешенең көсө уның аҡылында; **си́ла сло́ва** һүҙҙең көсө; **си́ла привы́чки** ғәҙәт ҡеүәһе; **си́ла коллекти́ва** коллектив көсө **5.** ҡеүәт, көс (*нимәнеңдер ғәмәлләшеү, сағылыу кимәле*); **си́ла взры́ва** шартлау ҡеүәте; **си́ла ве́тра** ел көсө; **си́ла све́та** яҡтылыҡ көсө; **си́ла любви́** мөхәббәт көсө **6.** (*правомочность*) көс, ғәмәл; **зако́н вступи́л в си́лу** закон ғәмәлгә инде; **зако́н утра́тил си́лу** закон көсөн юғалтҡан **7.** *обычно мн.* **си́лы** көстәр; **си́лы приро́ды** тәбиғәт көстәре; **производи́тельные си́лы** етештереү көстәре **8.** *обычно мн.* **си́лы** көстәр, хәрби ҡеүәт; **вооруже́нные си́лы** ҡоралды көстәр ♦ **(быть) в си́лах** көс етерлек, хәлдән килерлек; **в си́ле** көсөндә, үҙ көсөндә, ғәмәлдә; **в си́лу** арҡаһында, сәбәпле; **от си́лы** күп тигәндә, иң күбе; **по ме́ре сил** ҡулдан (хәлдән) килгәнсә; **по си́ле возмо́жности** *прост.* хәлдән килгән саҡлы, ҡулдан килгән хәтле, хәл ҡеҙәренсә; **сил нет, как** *прост.* бик, үтә, сыҙап (түҙеп) торорлоҡ түгел; **си́лою обстоя́тельств** ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында; **си́лою в (до, от ... до)** миҡдарҙа, иҫәбендә, һан менән; **че́рез си́лу** көстән тыш; **что есть си́лы** бөтә көскә

**СИЛА́Ч** *м* бәһлеүән, үтә ғәйрәтле кеше

**СИЛИКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** силикат ...ы; **силика́тный заво́д** силикат заводы; **силика́тная промы́шленность** силикат сәнәғәте **2.** силикаттан яһалған, силикат ...ы; **силика́тный клей** силикат елеме

**СИЛИКА́ТЫ** *мн.* (*ед.* **силика́т** *м*) силикаттар (**1.** *составында кремнезём булған минералдарҙың дөйөм атамаһы* **2.** *күп кенә төҙөлөш һәм сәнәғәт материалдарының дөйөм атамаһы*)

**СИЛИКО́З** *м*; *мед.* силикоз (*таш саңы йотоп эшләгән таусыларҙың үпкә ауырыуы*)

**СИ́ЛИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* тырышыу, көсәнеү, көсәнеп маташыу

**СИЛЛАБИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лит.* силлабик (*баҫымды иҫәпкә алмай ижек һанына ҡоролған шиғыр төҙөлөшө*); **силлаби́ческие стихи́** силлабик шиғырҙар

**СИЛЛА́БО-ТОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лит.* силлабо-тоник (*ижек һанына һәм баҫымлы-баҫымһыҙ ижектәрҙең сиратлаштырыуына ҡоролған шиғыр төҙөлөшө*); **силла́бо-тони́ческая систе́ма стихосложе́ния** шиғыр төҙөлөшөнөң силлабо-тоник системаһы

**СИЛЛОГИ́ЗМ** *м*; *лог.* силлогизм (*ике нигеҙҙән сығып һығымта яһауға ҡоролған фекерләү ысулы*)

**СИЛОВО́Й,** -ая, -ое **1.** *спорт.* көс талап итә торған; **силовы́е упражне́ния** көс талап итә торған күнегеүҙәр **2.** *физ., тех.* көс ...ы, энергия биреү (тапшырыу) ...ы; **силово́е по́ле** көс полеһы; **силова́я ста́нция** энергия биреү станцияһы

**СИ́ЛОЙ** и **СИ́ЛОЮ** *нареч.* көсләп, ирекһеҙләп, мәжбүр итеп; **си́лой увезти́** көсләп алып китеү

**СИЛО́К** *м* тоҙаҡ, тур; **ста́вить сило́к** тоҙаҡ һалыу (ҡороу); **лови́ть силко́м** тоҙаҡ менән тотоу

**СИЛОМЕ́Р** *м* көс үлсәгес

**СИ́ЛОС** *м* силос; **закла́дка си́лоса** силос һалыу; **комбини́рованный си́лос** ҡатнаш силос

**СИ́ЛОСНЫЙ,** -ая, -ое силос ...ы; **си́лосная я́ма** силос соҡоро; **си́лосные корма́** силос аҙыҡтары

**СИЛОСОВА́НИЕ** *с см.* **силосова́ть**; **силосова́ние кукуру́зы** кукурузды силослау

**СИЛОСОВА́ТЬ** *сов., несов.* силослау; **силосова́ть ботву́ свёклы** сөгөлдөр һабағын силослау

**СИЛОСОУБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое силос саба торған; **силосоубо́рочные маши́ны** силос саба торған машиналар

**СИЛУЭ́Т** *м* **1.** силуэт (*берәй нәмәнең башҡа төҫтәге икенсе бер нәмә ерлегендә сағылышы*) **2.** шәүлә, силуэт; **силуэ́ты дере́вьев** ағастар шәүләһе

**СИЛУЭ́ТНЫЙ,** -ая, -ое силуэт ...ы; **силуэ́тный фотосни́мок** силуэт фотоһүрәт



13 зак. 2.0007.06

**СИ́ЛЬНО** *нареч.* **1.** ҡаты (ныҡ, көслө) итеп; **си́льно уда́рить** ныҡ итеп һуғыу **2.** бик ныҡ, бик насар, үлеп; **си́льно люби́ть** үлеп яратыу; **си́льно боле́ть** бик ныҡ ауырыу ♦ **си́льно сказа́ть (вы́разиться)** арттырып (ҡабартып) әйтеү

**СИЛЬНОДЕ́ЙСТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее үтә көслө (тәьҫирле), ныҡ (көслө) тәьҫир итә торған; **сильноде́йствующее лека́рство** үтә көслө дарыу

**СИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* көслө, ҡеүәтле; **си́льный челове́к** көслө кеше; **си́льная а́рмия** ҡеүәтле армия **2.** (*твёрдый, стойкий*) көслө, ныҡлы; **си́льная во́ля** көслө ихтыяр **3.** (*значительный по степени проявления*) ҡаты, көслө; **си́льный ве́тер** ҡаты ел; **си́льная за́суха** көслө ҡоролоҡ; **си́льное лека́рство** көслө дарыу; **си́льное жела́ние** көслө теләк; **си́льное чу́вство** көслө тойғо **4.** оҫта, һәләтле, көслө; **си́льный писа́тель** һәләтле яҙыусы; **си́льный шахмати́ст** көслө шахматсы ♦ **си́льная сторона́** иң яҡшы сифаты (үҙенсәлеге); **си́льные слова́ (выраже́ния)** әшәке һүҙҙәр, һүгенеү һүҙҙәре; **си́льный пол** *см.* **пол** II

**СИМБИО́З** *м*; *биол.* симбиоз (*төрлө төргә ҡараған ике организмдың үҙ-ара ярашып бергә йәшәүе*); **симбио́з гриба́ и во́доросли** бәшмәк менән ылымыҡ симбиозы

**СИ́МВОЛ** *м* символ; **бе́лый го́лубь — си́мвол ми́ра** аҡ күгәрсен — тыныслыҡ символы

**СИМВОЛИЗА́ЦИЯ** *ж* символлаштырыу

**СИМВОЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* символлаштырыу, символ булыу, символ булып хеҙмәт итеү

**СИМВОЛИ́ЗМ** *м* **1.** *см.* **симво́лика** 1; **2.** символизм (*XIX б. аҙағы — XX б. башындағы Европа һәм Рәсәй сәнғәтендә реализмға ҡаршы йүнәлеш*)

**СИМВО́ЛИКА** *ж* **1.** символика (*берәй нәмәнең символик мәғәнәһе*); **симво́лика чи́сел** һандар символикаһы **2.** *собир.* символика, символдар, символдар системаһы; **олимпи́йская симво́лика** Олимпиада символикаһы

**СИМВОЛИ́СТ** *м* и **СИМВОЛИ́СТКА** *ж* символсы (*символизм яҡлы кеше*)

**СИМВОЛИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое символизм ...ы, символсы ...ы, символистик; **символи́стская поэ́зия** символизм поэзияһы

**СИМВОЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** символик, символ булып торған; **символи́ческий о́браз** символик образ; **символи́ческий знак** символик тамға **2.** *см.* **символи́стский 3.** (*условный*) шартлы; **символи́ческая цена́** шартлы хаҡ

**СИММЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое симметрик, симметриялы; **симметри́ческое строе́ние** симметрик ҡоролош

**СИММЕТРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **симметри́ческий**

**СИММЕ́ТРИЯ** и **СИММЕТРИ́Я** *ж* симметрия (*бер бөтөн нәмә өлөштәренең үҙәктән бер тигеҙ аралыҡта урынлашыуы*); **симме́трия геометри́ческих фигу́р** геометрик фигуралар симметрияһы

**СИМПАТИЗИ́РОВАТЬ** *несов. кому-чему* күңелгә ятыу (оҡшау, хуш килеү), яратыу, яҡын күреү

**СИМПАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *уст. см.* **симпати́чный 2.** *физиол.* симпатик (*вегетатив нервы системаһына ҡараған*) ♦ **симпати́ческие черни́ла** төҫһеҙ ҡара (*йәшерен яҙыуҙар өсөн ҡулланыла*)

**СИМПАТИ́ЧНОСТЬ** *ж* һөйкөмлөлөк, яғымлылыҡ, мөләйемлек

**СИМПАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое һөйкөмлө, яғымлы, мөләйем; **симпати́чная де́вочка** һөйкөмлө ҡыҙыкай

**СИМПА́ТИЯ** *ж* **1.** симпатия, күңел ятыу, яратыу, мөхәббәт; **испы́тывать симпа́тию** күңел ятыу **2.** *чья*; *разг.* (*любимый человек*) һөйгән (яратҡан, ғашиҡ булып йөрөгән) кеше

**СИМПО́ЗИУМ** *м* симпозиум (*ғилми мәсьәләгә арналған халыҡ-ара кәңәшмә*); **симпо́зиум по вопро́сам гене́тики** генетика мәсьәләләре буйынса симпозиум

**СИМПТО́М** *м* симптом (**1.** *мед. ниндәйҙер ауырыуҙың тышҡы билдәһе* **2.** *ниндәйҙер күренештең тышҡы сағылышы*)

**СИМПТОМА́ТИКА** *ж*; *мед.* симптоматика (*ниндәйҙер ауырыуға хас билдәләр йыйылмаһы*)

**СИМПТОМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое симптоматик

**СИМУЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* юрый булып ҡыланыу (күренеү), -ҡа/-кә һалышыу, күҙ буяу, хәйләләү; **симули́ровать глухоту́** юрый һаңғырау булып ҡыланыу

**СИМУЛЯ́НТ** *м* и **СИМУЛЯ́НТКА** *ж* симулянт, ҡыланыусы

**СИМУЛЯ́НТСКИЙ,** -ая, -ое симулянт ...ы; **симуля́нтское поведе́ние** симулянт ҡыланышы

**СИМУЛЯ́ЦИЯ** *ж* симуляция, хәйләләү, күҙ буяу

**СИМФОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое симфоник; **симфони́ческая му́зыка** симфоник музыка ♦ **симфони́ческий орке́стр** симфоник оркестр (*ҡыллы, тынлы һәм һуҡма ҡоралдарҙан торған музыкаль ансамбль*)

**СИМФО́НИЯ** *ж* симфония (**1.** *оркестр өсөн яҙылған ҙур күләмле музыкаль әҫәр* **2.** *күсм. үҙ-ара аһәңлелек тыуҙырған төрлө тауыш, төҫ, буяу, тон һ.б.*)

**СИНАГО́ГА** *ж* синагога (*йәһүдтәрҙең ғибәҙәт йорто һәм йәмғиәте*)

**СИНГАРМОНИ́ЗМ** *м*; *лингв.* сингармонизм (*һүҙҙәге һуҙынҡыларҙың ҡалынлыҡ йәки нәҙеклек йәһәтенән оҡшашыуы*)

**СИНДИКА́Т** *м* синдикат (**1.** *монополистик берекмә* **2.** *Франция һ.б. ҡайһы бер илдәрҙәге профсоюздар* **3.** *Рәсәйҙә 1920 й. аҙағына тиклем трестарҙы берләштергән хужалыҡ ойошмаһы*)

**СИНДИКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое синдикат ...ы; **синдика́тные организа́ции** синдикат ойошмалары

**СИНДРО́М** *м*; *мед.* синдром (*ауырыу билдәләре*)

**СИНЕВА́** *ж* күк (күгелйем, күкһел, зәңгәрһыу) төҫ, зәңгәрлек; **синева́ не́ба** күктең зәңгәрлеге; **синева́ мо́ря** диңгеҙҙең күкһел төҫө

**СИНЕГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое зәңгәр (күк) күҙле

**СИНЕ́КДОХА** *ж*; *лит.* синекдоха (*метонимия төрө, нәмәнең үҙе урынына бер өлөшөн йәки өлөшө урынына тотош үҙен атауға ҡоролған стилистик алым*)

**СИНЕКУ́РА** *ж*; *книжн.* синекура (*күп көс һалыуҙы талап итмәгән юғары хаҡ түләнә торған эш*)

**СИНЕ́ЛЬ** *ж* синель (*сигеүҙә, бәйләмдә һәм эшләпәләр биҙәүҙә өсөн ҡулланылған йөнтәҫ бәрхәт еп*)

**СИНЕРА́МА** *ж* синерама (*киң экранлы кинонын бер системаһы*)

**СИНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*становиться синим*) күгәреү, күкһелләнеү, зәңгәрләнеү; **сине́ть от хо́лода** һыуыҡтан күгәреү **2.** (*виднеться — о чём-л. синем*) күгәреп (зәңгәрләнеп) күренеү; **васильки́ сине́ют** күксиндәр зәңгәрләнеп күренә

**СИ́НИЙ,** -яя, -ее **1.** күк, зәңгәр, күк (зәңгәр) төҫтәге; **си́ний цвет** күк төҫ; **си́няя кра́ска** күк төҫтәге буяу **2.** (*о коже*) буҙарған; (*о лице*) төҫө ҡасҡан; **си́ние от хо́лода ру́ки** һыуыҡтан буҙарған ҡулдар

**СИНИ́ЛЬНЫЙ: сини́льная кислота́** синиль кислотаһы (*әсе миндаль еҫле төҫһеҙ шыйыҡ ағыу*)

**СИНИ́ТЬ** *несов. что* **1.** (*красить в синий цвет*) күккә (зәңгәргә) буяу; **сини́ть ткань** туҡыманы күккә буяу **2.** (*полоскать с синькой*) синкегә маныу, синкеләү; **сини́ть бельё** керҙе синкеләү

**СИНИ́ЦА** *ж* ҡарабаш турғай

**СИНКО́ПА** *ж* синкопа (**1.** *муз. музыкаль баҫымдың көслө ритмдан йомшаҡ ритмға күсеүе* **2.** *лингв. һүҙ уртаһында өндөң төшөп ҡалыуы*)

**СИНКРЕТИ́ЗМ** *м* синкретизм (*башланғыс үҫештәге бөтөнлөк, берлек*); **синкрети́зм первобы́тного иску́сства** тәүтормош сәнғәте синкретизмы

**СИНКРЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое синкретик; **синкрети́ческое иску́сство** синкретик сәнғәт; **синкрети́ческая нау́ка** синкретик фән

**СИНО́Д** *м* **1.** Синод (*Урыҫ православие сиркәүенең юғары органы*); **зда́ние Сино́да** Синод йорто **2.** синод (*протестант сиркәүенең руханиҙары һәм донъяуи кешеләр ингән йыйылышы*)

**СИНОДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое синод …ы, Синод …ы; **синода́льная библиоте́ка** Синод китапханаһы ♦ **Синода́льный хор** Синод хоры

**СИНОДИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *астр.* синодик (*күк есемдәренең Ҡояшҡа йәки бер-береһенә ҡарата урынлашыу мөнәсәбәте*)

**СИНО́ДСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **синода́льный**

**СИНО́ЛОГ** *м* синолог (*синология белгесе*)

**СИНОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое синология …ы, синологик; **синологи́ческие иссле́дования** синологик тикшеренеүҙәр

**СИНОЛО́ГИЯ** *ж* синология (*Ҡытай иҡтисадын, телен, тарихын, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен өйрәнә торған фәндәр*)

**СИНО́НИМ** *м*; *лингв.* синоним (*мәғәнәләш һүҙҙәр*)

**СИНОНИ́МИКА** *ж*; *лингв.* синонимика (**1.** *теге йәки был телдәге синонимдар йыйылмаһы* **2.** *лексикологияның синонимдарҙы өйрәнгән бүлеге*)

**СИНОНИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лингв.* синонимик, синоним(дар) …ы; **синоними́ческие выраже́ния** синонимик әйтемдәр; **синоними́ческий слова́рь** синонимдар һүҙлеге

**СИНОНИМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **синоними́ческий**

**СИНОНИМИ́Я** *ж*; *лингв.* синонимлыҡ, мәғәнәләшлек

**СИНО́ПТИК** *м* синоптик (*һауа торошон күҙәтеүсе*)

**СИНО́ПТИКА** *ж* синоптика (*атмосфера процестарын күҙәтеп, прогноз яһауҙы өйрәнгән метеорология фәненең бүлеге*)

**СИНОПТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** синоптик, дөйөм, йыйылма **2.** *метеор.* синоптик ♦ **синопти́ческая ка́рта** синоптик карта (*билдәле ваҡыттағы һауа торошон сағылдырған карта*); **синопти́ческая метеороло́гия** *см.* **сино́птика**

**СИНТА́ГМА** *ж*; *лингв.* синтагма (*һөйләмдә интонацион һәм мәғәнәүи берҙәмлек тәшкил иткән һүҙбәйләнештәр*)

**СИ́НТАКСИС** *м* синтаксис (*грамматиканың һөйләм төҙөлөшөн өйрәнә торған бүлеге*)

**СИНТАКСИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лингв.* синтаксик; **синтакси́ческий ана́лиз предложе́ния** һөйләмгә синтаксик анализ яһау

**СИ́НТЕЗ** *м* синтез (**1.** *күренештәрҙе һәм предметтарҙы берҙәмлек, үҙ-ара бәйләнеш нигеҙендә өйрәнгән ғилми-тикшеренеү ысулы* **2.** *хим. ябай матдәләрҙе йәки элементтарҙы ҡушып, бер ҡатмарлы матдә алыу*)

**СИНТЕЗИ́РОВАНИЕ** *с см.* **синтези́ровать**

**СИНТЕЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** синтез яһау, берләштереү, синтезлау; **синтези́ровать да́нные наблюде́ний** күҙәтеүҙәр мәғлүмәттәрен синтезлау **2.** *хим.* синтезлау; **синтези́ровать краси́тели** буяуҙар синтезлау

**СИНТЕ́ТИКА** *ж* синтетика (*химик синтез юлы менән табылған матдә һәм шул матдәнән яһалған нәмә*); **костю́м из синте́тики** синтетиканан тегелгән костюм

**СИНТЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* синтетик; **синтети́ческий ме́тод иссле́дования** тикшеренеүҙең синтезлауға нигеҙләнгән ысулы; **синтети́ческое волокно́** *хим.* синтетик сүс; **синтети́ческие языки́** *лингв.* синтетик телдәр

**СИ́НУС** *м* **1.** *мат.* синус (*тригонометрик функция*) **2.** *анат.* ҡыуышлыҡ

**СИНУСО́ИДА** *ж*; *мат.* синусоида (*синус үҙгәреүен күрһәткән тулҡын һымаҡ график һыҙыҡ*)

**СИНХРОНИЗА́ТОР** *м* синхронизатор (*теге йәки был процестың бер үк ваҡытта үтеүен тәьмин итә торған ҡулайлама*)

**СИНХРОНИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **синхронизи́ровать**

**СИНХРОНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *тех.* синхронлаштырыу (*бер үк ваҡытта эшләтеү*)

**СИНХРОНИ́ЗМ** *м*; *книжн.* синхронизм (*бер үк ваҡытта булыу*)

**СИНХРОНИ́Я** *ж* синхрония (**1.** *ике йәки бер нисә күренештең, процестың ваҡыт яғынан тап килеүе, бер үк ваҡытта булыуы* **2.** *лингв. телдәге элементтарҙың тарихи бер дәүерҙә йәнәш йәшәүе һәм үҙ-ара бойондороҡлолоғо*)

**СИНХРО́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* синхроник, синхронлы, бер үк ваҡыттағы, туранан-тура; **синхро́нный перево́д** синхронлы тәржемә

**СИНХРОТРО́Н** *м* синхротрон (*зарядланған өлөшсәләрҙең хәрәкәтен тиҙләтә торған ҡоролма*)

**СИНХРОФАЗОТРО́Н** *м* синхрофазотрон (*протондар хәрәкәтен тиҙләтә торған ҡоролма*)

**СИНЬ** *ж* **1.** *см.* **синева́** **2.** *спец.* зәңгәр (күк) буяу; **кра́сить си́нью** зәңгәр буяу менән буяу **3.** *горн.* күк (*күк, зәңгәр төҫтәге ҡайһы бер мәғдәндәрҙең исеме*); **ме́дная синь** баҡыр күге

**СИ́НЬКА** *ж* **1.** *см.* **сини́ть** **2.** синке (*аҡ туҡыманы мана торған күк буяу*; *күсергес ҡағыҙ*)

**СИНЬО́Р** *м* синьор, әфәнде (*Италияла фамилияға йәки исемгә ҡушып әйтелгән ир-атҡа өндәшеү һүҙе*)

**СИНЬО́РА** *ж* синьора, ханым (*Италияла ҡатындарға өндәшеү һүҙе*)

**СИНЬОРИ́НА** *ж* синьорина, туташ (*Италияла ҡыҙҙарға өндәшеү һүҙе*)

**СИНЮ́ХА** *ж* **1.** *мед.* тире күгәреү **2.** *бот.* фаягөл, тумыртҡа мышары

**СИНЯ́К** *м* күгәргән урын (ер), күк ♦ **синяки́ под глаза́ми** күҙ төбөндәге күктәр

**СИОНИ́ЗМ** *м* сионизм

**СИОНИ́СТ** *м* сионист (*сионизм яҡлы кеше*)

**СИОНИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое сионистик; **сиони́стская организа́ция** сионистик ойошма

**СИПЕ́ТЬ** *несов.* **1.** ғыжлау, ғыжылдау, ғыж-ғыж килеү, ҡарлығыу; **сипе́ть просту́женным го́лосом** һалҡын тейҙереп ғыжылдап һөйләшеү **2.** пышылдау, пыш-пыш килеү; **парово́з сипи́т** паровоз пыш-пыш килә

**СИ́ПЛЫЙ,** -ая, -ое ғыжылдаҡ, ғыж-ғыж килгән, ҡарлыҡҡан; **си́плый го́лос** ғыжылдаҡ тауыш

**СИ́ПНУТЬ** *несов.* ғыжылдай (ғыж-ғыж килә) башлау

**СИПОТА́** *ж* ғыжылдаҡ тауыш

**СИРЕ́НА** *ж*; *в разн. знач.* сирена; **включи́ть сире́ну** сиренаны тоҡаштырыу

**СИРЕ́НЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** сирень ...ы, күксин ...ы; **сире́невый куст** сирень ҡыуағы; **сире́невый за́пах** сирень еҫе **2.** (*о цвете*) сирень (күксин) төҫөндәге; **сире́невая ле́нта** сирень төҫөндәге таҫма

**СИРЕ́НЬ** *ж* сирень, күксин

**СИРИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое сүрий ...ы, Сүриә ...ы; **сири́йский наро́д** Сүриә халҡы; **сири́йские ара́бы** Сүриә ғәрәптәре

**СИРИ́ЙЦЫ** *мн.* сириялылар, сүриәлеләр, Сирия (Сүриә) халҡы // *ед.* **сири́ец** *м* сирий ир-ат; **сири́йка** *ж* сирий ҡатын-ҡыҙ

**СИРО́ККО** *с* сирокко (*Европаның көньяғына Төньяҡ Африка сүлдәренән иҫкән эҫе томра ел*)

**СИРО́П** *м* **1.** сироп (*ҡуйы шәрбәт*) **2.** *фарм.* (*густой отвар*) төнәтмә

**СИРОТА́** *м* и *ж* етем, йәтим, үкһеҙ кеше; (*о девочке*) йәтимә; **кру́глый сирота́** үкһеҙ етем

**СИРОТЕ́ТЬ** *несов.* етем (йәтим) ҡалыу

**СИРОТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** етемһерәгән, йәтимһерәгән, яңғыҙ, япа-яңғыҙ; **сиротли́вая ста́рость** яңғыҙ ҡартлыҡ **2.** *перен.* (*унылый, жалкий*) бойоҡ, моңһоу, һағышлы; **сиротли́вое по́ле** моңһоу ялан

**СИРО́ТСКИЙ,** -ая, -ое етем ...ы, йәтимлек, йәтим ...ы, етемлек; **сиро́тская жизнь** етемлек тормошо

**СИРО́ТСТВО** *с* **1.** етемлек, йәтимлек, етемселек, йәтимселек **2.** *перен.* (*одиночество*) яңғыҙлыҡ; **жить в сиро́тстве** яңғыҙлыҡта йәшәү

**СИСТЕ́МА** *ж*; *в разн. знач.* система; **привести́ в систе́му** системаға килтереү (һалыу); **аттестацио́нная систе́ма** аттестация системаһы; **избира́тельная систе́ма** һайлау системаһы; **Со́лнечная систе́ма** Ҡояш системаһы; **граммати́ческая систе́ма языка́** телдең грамматик системаһы; **не́рвная систе́ма** нервы системаһы; **систе́ма образова́ния** мәғариф системаһы; **госуда́рственная систе́ма** дәүләт системаһы; **рабо́тать в систе́ме Акаде́мии нау́к РБ** БР фәндәр академияһы системаһында эшләү

**СИСТЕМАТИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **систематизи́ровать**

**СИСТЕМАТИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** системалау, тәртипкә (системаға) килтереү (һалыу); **систематизи́ровать зна́ния** белемде системаға килтереү **2.** *см.* **классифици́ровать**

**СИСТЕМА́ТИКА** *ж*; *в разн. знач.* систематика; **системáтика расте́ний** үҫемлектәр систематикаһы

**СИСТЕМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** системаға (тәртипкә) һалынған, системалы; **системати́ческие зна́ния** системалы белем **2.** (*постоянный*) системалы рәүештә булған, даими; **системати́ческое повыше́ние жи́зненного у́ровня** йәшәү кимәленең даими күтәрелеүе

**СИСТЕМАТИ́ЧНОСТЬ** *ж* системалылыҡ, системалы рәүештә булыу; **системати́чность в рабо́те** эштәге системалылыҡ

**СИ́ТЕЦ** *м* ситса (*туҡыма*); **бе́лый си́тец** аҡ ситса

**СИ́ТНИК I** *м*; *разг.* (*хлеб*) иләнгән ондан бешерелгән икмәк

**СИ́ТНИК II** *м* ҡуһа, ситник (*ҡыяҡ үләнгә оҡшаған һепертке башлы бер өлөшлө үҫемлек*)

**СИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*просеянный*) иләнгән; **си́тная мука́** иләнгән он **2.** иләнгән ондан бешерелгән; **си́тный хлеб** иләнгән ондан бешерелгән икмәк **3.** *в знач. сущ.* **си́тный** *м* иләнгән ондан бешерелгән икмәк

**СИ́ТО** *с* иләк; **ме́лкое си́то** ваҡ иләк; **обод си́та** иләк тирәсе

**СИТРО́** *с нескл.* ситро (*алкоголһеҙ һалҡын емеш һыуы*)

**СИТУА́ЦИЯ** *ж* **1.** ситуация, хәл, шарт; **полити́ческая ситуа́ция** сәйәси хәл **2.** *геод.* ситуация (*картала йәки планда шартлы билдәләр менән күрһәтелгән һыу, урман, тау, ауыл һ.б.*)

**СИ́ТЦЕВЫЙ,** -ая, -ое ситса; **си́тцевое пла́тье** ситса күлдәк

**СИТЦЕНАБИВНО́Й,** -ая, -ое ситса биҙәкләй торған, ситса биҙәкләү ...ы; **ситценабивна́я фа́брика** ситса биҙәкләү фабрикаһы

**СИ́ФИЛИС** *м* сифилис, силсә (*йоғошло венерик ауырыу*)

**СИФИЛИ́ТИК** *м*; *разг.* сифилитик (*силсә менән ауырыған кеше*)

**СИФИЛИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** сифилис ...ы, силсә ...ы; **сифилити́ческая сыпь** силсә сабыртмаһы **2.** сифилис (силсә) менән ауырыған; **сифилити́ческий больно́й** силсә менән ауырыған кеше

**СИФО́Н** *м* сифон (**1.** *өҫтәге һауыттың ауыҙы аша түбәндәгеһенә шыйыҡлыҡ ағыҙа торған кәкре көпшә* **2.** *шундай көпшә ҡуйылған газлы минераль һыу шешәһе* **3.** *паровоз мейесенең тартыуын көсәйтә торған ҡулайлама*)

**СИФО́ННЫЙ,** -ая, -ое сифон ...ы; **сифо́нная труба́** сифон көпшәһе

**СИЯ́** *ж мест. см.* **сей**

**СИЯ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сия́ть**; **сия́ние луны́** ай балҡыуы **2.** яҡтылыҡ, яҡты, балҡыу, балҡыш; **сия́ние со́лнечных луче́й** ҡояш нурҙарының балҡышы **3.** *перен.* янып (ялтырап, балҡып) тороу; **сия́ние глаз** күҙҙәр янып тороу ♦ **се́верное (поля́рное) сия́ние** төньяҡ балҡышы, һаҙағай

**СИЯ́ТЕЛЬСТВО** *с*; *уст.* ғали йәнәп (*кенәҙҙәргә, графтарға һ.б. өндәшеү һүҙе*)

**СИЯ́ТЬ** *несов.* **1.** балҡыу, ялтырау, емелдәү, ем-ем итеү, нур сәсеү (һибеү); **звёзды сия́ют** йондоҙҙар ем-ем итә **2.** *перен.* янып (ялтырап, балҡып) тороу; **сия́ть от ра́дости** шатлыҡтан балҡып тороу

**СКАБИО́ЗА** *ж* ҡытыршыҡай, сипылдаҡ (*ҡара-ҡаршы оҙон япраҡлы, эре сүк сәскәле үлән*)

**СКАБРЁЗНОСТЬ** *ж* **1.** оятһыҙ (әҙәпһеҙ, әшәке) булыуы; **скабрёзность анекдо́та** көләмәстең оятһыҙ булыуы **2.** (*неприличное слово, выражение*) оятһыҙ (әҙәпһеҙ, әшәке) һүҙ; **говори́ть скабрёзности** әшәке һүҙҙәр һөйләү

**СКАБРЁЗНЫЙ,** -ая, -ое оятһыҙ, әҙәпһеҙ, әшәке; **скабрёзное выраже́ние** әшәке һүҙ

**СКАЗ** *м* **1.** риүәйәт, иҫтәлек (*халыҡ ижадында берәй ваҡиға йәки күренекле шәхес тураһында телдән һөйләнә торған бәләкәй генә әҫәр*) **2.** хикәйәләү, бәйән итеү; **мане́ра ска́за** хикәйәләү рәүеше **3.** хикәйә (*беренсе заттан яҙылған әҙәби әҫәр*); **ска́зы Ба́жова** Бажов хикәйәләре ♦ **вот тебе́ и весь сказ** һиңә әйтер һүҙем шул, шуның менән вәссәләм

**СКАЗА́НИЕ** *с* хикәйәт, иртәк; **сказа́ния о богатыря́х** батырҙар тураһында иртәктәр

**СКАЗА́ТЬ** *сов. что* **1.** әйтеү, тип әйтеү, әйтеп биреү; **сказа́ть пра́вду** дөрөҫөн әйтеү; **сказа́ть своё мне́ние** үҙ фекереңде әйтеү **2.** *в 1 л. мн. ч. буд. вр.* **ска́жем** *в знач. вводн. сл.* әйтәйек ♦ **как сказа́ть** нисек итеп әйтергә инде; **к приме́ру сказа́ть** әйтәйек, мәҫәлән; **кста́ти сказа́ть** һүҙ уңайында әйткәндә; **лу́чше (верне́е, точне́е, про́ще) сказа́ть** *в знач. вводн. сл.* дөрөҫөрәген әйткәндә; **мо́жно сказа́ть** *в знач. вводн. сл.* әйтергә була (кәрәк); **не́чего сказа́ть**: 1) (*действительно, в самом деле*) ысынлап та, дөрөҫөндә; 2) (*как отрицательное отношение к чему-л.*) әйтәһе түгел, әйтерең бармы, әйтеп тораһы юҡ; **к сло́ву сказа́ть** *см.* **сло́во**; **нельзя́ сказа́ть, что́бы** *см.* **нельзя́**; **ба́бушка (еще) на́двое сказала** *см.* **ба́бушка**; **так сказа́ть** *в знач. вводн. сл.* шулай итеп, тимәк; **шу́тка ли сказа́ть** *см.* **шу́тка**

**СКАЗА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*быть произнесённым*) әйтелеү; **в пи́сьмах всё не ска́жется** хаттарҙа барыһы ла әйтелмәй **2.** (*проявиться*) беленеү, һиҙелеү, күренеү, сағылыу, килеп сығыу; **ска́зывается уста́лость** арығанлыҡ һиҙелә **3.** *разг.* (*назваться*) тип алдашыу (хәйләләү), һалышыу; **сказа́ться больны́м** ауырыйым тип хәйләләү **4.** *кому* и *без доп.*; *прост.* (*сообщить, предупредить*) әйтеү, әйтеп ҡуйыу, иҫкәртеү; **уйти́ не сказа́вшись** алдан әйтмәйенсә китеп барыу

**СКАЗИ́ТЕЛЬ** *м* и **СКАЗИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* экиәтсе, бәйетсе, риүәйәтсе, сәсән

**СКА́ЗКА** *ж*; *в разн. знач.* экиәт; **башки́рские наро́дные ска́зки** башҡорт халыҡ экиәттәре; **всё э́то ска́зки** быларҙың барыһы ла экиәт кенә ♦ **ска́зка про бе́лого бычка́** бер үк балыҡ башы; **ни в ска́зке сказа́ть, ни перо́м описа́ть** бик шәп, бик һәйбәт, әйтергә түгел, иҫ киткес

**СКА́ЗОЧНИК** *м* и **СКА́ЗОЧНИЦА** *ж* экиәтсе, экиәт һөйләүсе

**СКА́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** экиәт ...ы; **ска́зочные персона́жи** экиәт персонаждары **2.** экиәттәге, экиәттә генә була торған; **ска́зочные стра́ны** экиәттәге илдәр

**СКАЗУ́ЕМОЕ** *с*; *грам.* хәбәр; **просто́е сказу́емое** ябай хәбәр; **составно́е сказу́емое** ҡушма хәбәр

**СКАЗУ́ЕМОСТЬ** *ж*; *грам.* хәбәрлек; **катего́рия сказу́емости** хәбәрлек категорияһы

**СКА́ЗЫВАТЬ** *несов. что*; *уст. прост.* **1.** (*говорить*) әйтеү **2.** (*рассказывать*) һөйләү

**СКА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сказа́ться** 2, 3; **2.** *страд. от* **ска́зывать** 2

**СКАКА́ЛКА** *ж* һикергес, ырғымыс; **пры́гать че́рез скака́лку** ырғымыс менән һикерәнләү

**СКАКА́ТЬ** *несов.* **1.** (*прыгать*) һикереү, ырғыу; **скака́ть че́рез верёвочку** бау аша һикереү; **скака́ть на одно́й ноге́** бер аяҡта һикереү **2.** (*ехать вскачь, быстро*) сабыу; **скака́ть в го́род** ҡалаға сабыу **3.** (*участвовать в скачках — о лошадях*) бәйгелә (сабышта) ҡатнашыу, сабышыу **4.** *перен.* кинәт (киҫкен) күтәрелеү, һикереү; **температу́ра ска́чет** температура кинәт күтәрелә

**СКАКОВО́Й,** -ая, -ое сабыш ...ы, ат ...ы; **скакова́я ло́шадь** сабыш аты; **скаковы́е соревнова́ния** ат ярыштары

**СКАКУ́Н** *м* сабыш (бәйге) аты, йүгерек, сапҡыр; **соревнова́ние скакуно́в** сапҡырҙар ярышы

**СКАЛА́** *ж* ҡая, ҡая таш; **подво́дная скала́** һыу аҫты ҡаяһы

**СКАЛАМБУ́РИТЬ** *сов.* һүҙ уйнатыу

**СКАЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ҡаялы, ҡая ташлы; **скали́стый бе́рег** ҡаялы яр

**СКА́ЛИТЬ** *несов. что* теш күрһәтеү, ыржайтыу ♦ **ска́лить зу́бы** *прост.* ыржайыу (*ауыҙ йырып көлөү*)

**СКА́ЛИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** (*обнажаться — о зубах*) теш күрһәтеү, ыржайыу **2.** *см.* **ска́лить зу́бы**

**СКА́ЛКА** *ж* **1.** (*для теста*) уҡлау; (*для белья*) бәләк, кер туҡмағы, кер тәгәрәткес **2.** *тех.* скалка

**СКАЛОЛА́З** *м* ҡаяға менеүсе (*спортсы*)

**СКАЛОЛА́ЗАНИЕ** *с* ҡаяға менеү

**СКА́ЛЫВАНИЕ** *с см.* **ска́лывать**

**СКА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **сколо́ть**

**СКА́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сколо́ться** **2.** *страд. от* **ска́лывать**

**СКАЛЬД** *м* скальд (*Боронғо Скандинавияла йырсы, шағир*)

**СКАЛЬКИ́РОВАТЬ** *сов. что* калькалау (**1.** *махс. калька ҡағыҙы ярҙамында нимәнеңдер күсермәһен төшөрөп алыу* **2.** *лингв. сит тел ҡалыбына эйәреп яңы һүҙ йәки һүҙбәйләнеш яһау*)

**СКАЛЬКУЛИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **калькули́ровать**

**СКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡаялы, ҡая ташлы **2.** (*каменистый*) ташлы, ҡаты; **ска́льный грунт** ташлы тупраҡ; **ска́льная поро́да** ташлы (ҡаты) тоҡом **3.** *спец.* тау-таш ...ы, тау-таш араһында башҡарылған; **ска́льные рабо́ты** тау-таш эштәре

**СКАЛЬП** *м* скальп (*сәсе менән тунап алынған баш тиреһе*)

**СКА́ЛЬПЕЛЬ** *м* скальпель (*ҙур булмаған хирург бысағы*)

**СКАЛЬПИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* скалып алыу

**СКАМЕ́ЙКА** *ж см.* **скамья́**

**СКАМЬЯ́** *ж* эскәмйә; **сесть на скамью́** эскәмйәгә ултырыу ♦ **скамья́ подсуди́мых** суд эскәмйәһе (*хөкөм ителгән кешеләрҙең урыны*); **со шко́льной скамьи́** уҡыуҙы тамамлағас та

**СКАНДА́Л** *м* ғауға, янъял, талаш, ыҙғыш, низағ; **подня́ть сканда́л** ғауға күтәреү

**СКАНДАЛИ́СТ** *м* и **СКАНДАЛИ́СТКА** *ж* ғауғасы, янъялсы, талаш (ыҙғыш, низағ) күтәреүсе (ҡуптарыусы)

**СКАНДА́ЛИТЬ** *несов.* ғауғалашыу, янъял (талаш, ыҙғыш, низағ) ҡуптарыу (күтәреү)

**СКАНДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*позорящий*) ғауғалы, хурлыҡлы; **сканда́льный слу́чай** ғауғалы осраҡ **2.** *разг.* (*любящий скандалить*) ғауғасыл, дәғүәсел, бәләсел, тауыш (янъял, ыҙғыш) ҡуптарырға яратҡан; **сканда́льный челове́к** ғауғасыл кеше

**СКАНДИНА́ВСКИЙ,** -ая, -ое скандинав ...ы, Скандинавия ...ы; **скандина́вские стра́ны** Скандинавия илдәре; **скандина́вские языки́** скандинав телдәре

**СКАНДИНА́ВЫ** *мн.* скандинавиялылар, Скандинавия халыҡтары // *ед.* **скандина́в** *м* Скандинавия ир-аты; **скандина́вка** *ж* Скандинавия ҡатын-ҡыҙы

**СКАНДИ́РОВАНИЕ** *с см.* **сканди́ровать**; **сканди́рование ло́зунгов** лозунгыларҙы өҙөп-өҙөп ҡысҡырып әйтеү

**СКАНДИ́РОВАТЬ** *несов. что* и *без доп.* ижекләп (өҙөп-өҙөп) ҡысҡырып әйтеү (уҡыу); **сканди́ровать ло́зунги** лозунгыларҙы өҙөп-өҙөп ҡысҡырып уҡыу

**СКА́ПЛИВАТЬ** *несов. см.* **скопи́ть**

**СКА́ПЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **скопи́ться** **2.** *страд. от* **ска́пливать**

**СКАРБ** *м собир.*; *разг.* донъя кәрәк-ярағы, ваҡ-төйәк мөлкәт

**СКА́РЕД** *м* и **СКА́РЕДА** *м* и *ж*; *разг.* һаран, ҡомһоҙ (*кеше*)

**СКА́РЕДНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* һаранланыу, ҡомһоҙланыу

**СКА́РЕДНОСТЬ** *ж*; *разг.* һаранлыҡ, ҡомһоҙлоҡ

**СКА́РЕДНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* һаран, ҡомһоҙ; **ска́редный челове́к** һаран кеше

**СКАРИФИКА́ТОР** *м*; *с.-х.* скарификатор (**1.** *орлоҡто скарификациялау машинаһы* **2.** *скарификациялау ҡоралы*)

**СКАРИФИКА́ЦИЯ** *ж*; *с.-х.* скарификация, скарификациялау (**1.** *шытымын тиҙләтеү өсөн ҡайһы бер орлоҡтарҙы сәсеү алдынан эшкәртеү* **2.** *эсенә һауа үтһен өсөн ерҙе тәрән итеп йырыу*)

**СКАРЛАТИ́НА** *ж* скарлатина (*балаларҙың йоғошло ауырыуы*); **боле́ть скарлати́ной** скарлатина менән ауырыу

**СКАРЛАТИ́ННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* скарлатина ...ы; **скарлати́нная эпиде́мия** скарлатина эпидемияһы

**СКАРЛАТИНО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** скарлатина ...ы; **скарлатино́зная сыпь** скарлатина сабыртмаһы **2.** скарлатина менән ауырыған, скарлатиналы; **скарлатино́зный ребёнок** скарлатина менән ауырыған бала

**СКА́РМЛИВАТЬ** *несов. см.* **скорми́ть**

**СКАТ I** *м* **1.** *см.* **скати́ться — ска́тываться** II 1; **2.** (*пологий спуск*) һөҙәклек, иңкеүлек, бит, һөҙәк (иңкеү, ауыш) ер; (*крыши*) яҡ; **скат холма́** түбә бите; **скат кры́ши** ҡыйыҡтың яҡтары

**СКАТ II** *м*; *спец.* скат (*автомобиль тәгәрмәсе һәм уға кәрәкле резина*)

**СКАТ III** *м* скат (*диңгеҙҙә йәшәгән йыртҡыс балыҡ*)

**СКАТА́ТЬ** *сов. что* **1.** (тәгәрәтеп) төрөү; **ската́ть ковёр** келәмде төрөү **2.** тәгәр(л)әтеп (әүәләп) йомарлау (йомарлаҡ яһау); **ската́ть ша́рики из гли́ны** балсыҡтан әүәләп йомарлаҡ яһау **3.** *разг.* баҫыу; **ската́ть ва́ленки** быйма баҫыу **4.** *без доп.*; *прост.* (*сходить, сбегать куда-л.*) йүгереп (шәп кенә) барып килеү **5.** (*списать*) кешенекен (кешенән) күсереп алыу (яҙыу)

**СКАТА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** төрөлөү, йомарланыу **2.** (*сваляться — о волосах, шерсти*) кейеҙләнеү, ойошоу

**СКА́ТЕРТНЫЙ,** -ая, -ое ашъяулыҡ ...ы, ашъяулыҡлыҡ; **ска́тертный лён** ашъяулыҡлыҡ етен

**СКА́ТЕРТЬ** *ж* ашъяулыҡ; **вы́шитая ска́терть** сигеүле ашъяулыҡ ♦ **ска́тертью доро́га** дүрт яғың ҡибла, алдыңдан — артың

**СКАТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** тәгәр(л)әтеп төшөрөү; **скати́ть бо́чку в подва́л** мискәне баҙға тәгәрәтеп төшөрөү **2.** *см.* **скати́ться** 1

**СКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тәгәр(л)әп (шыуып) төшөү; **скати́ться с горы́** тауҙан шыуып төшөү **2.** *к чему*; *перен.* (*отступить от чего-л. передового*) -ға/-гә табан бороло (китеү, сығыу); **скати́ться к идеали́зму** идеализмға табан боролоу

**СКА́ТКА I** *ж* **1.** *см.* **ската́ть** 1, 3; **ска́тка бума́ги в руло́н** ҡағыҙҙы төргәк итеп урау **2.** *воен.* скатка (*төрөлгән шинель*)

**СКА́ТКА II** *ж см.* **скати́ть — ска́тывать** II; **ска́тка брёвен в во́ду** бүрәнәләрҙе һыуға тәгәрәтеп төшөрөү

**СКА́ТЫВАТЬ I** *несов. см.* **ската́ть** 1, 2

**СКА́ТЫВАТЬ II** *несов. см.* **скати́ть**

**СКА́ТЫВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **ската́ться** **2.** *страд. от* **ска́тывать** I

**СКА́ТЫВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **скати́ться** **2.** *страд. от* **ска́тывать** II

**СКАФА́НДР** *м* скафандр; **скафа́ндр космона́вта** космонавт скафандры

**СКА́ЧКА** *ж* **1.** сабыу, саптырып барыу **2.** *обычно мн.* **ска́чки** ат сабышы, сабыш, бәйге

**СКАЧКООБРА́ЗНОСТЬ** *ж* һикерешле (тигеҙһеҙ) булыу, тигеҙһеҙлек; **скачкообра́зность в разви́тии** үҫештәге тигеҙһеҙлек

**СКАЧКООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое һикерешле, тигеҙһеҙ, һикерешле булған, тигеҙ булмаған; **скачкообра́зные измене́ния** һикерешле үҙгәрештәр

**СКАЧО́К** *м* **1.** (*прыжок*) һикереү, һикереш; **де́лать больши́е скачки́** ҙур һикерештәр яһау **2.** ҡапыл күтәрелеү (үҙгәреү), киҫкен күтәрелеш; **скачо́к температу́ры** температураның ҡапыл күтәрелеүе **3.** *филос.* һикереш; **революцио́нный скачо́к** революцион һикереш **4.** кинәт (киҫкен) күтәрелеү, һикереү

**СКА́ШИВАНИЕ I** *с см.* **ска́шивать** I

**СКА́ШИВАНИЕ II** *с см.* **ска́шивать** II, **ска́шиваться** II 1

**СКА́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **скоси́ть** I

**СКА́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **скоси́ть** II

**СКА́ШИВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **ска́шивать** I

**СКА́ШИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **скоси́ться** **2.** *страд. от* **ска́шивать** II

**СКВА́ЖИНА** *ж* **1.** ярыҡ, тишек; **замо́чная сква́жина** йоҙаҡ тишеге **2.** скважина; **бурова́я сква́жина** быраулау скважинаһы; **нефтяна́я сква́жина** нефть скважинаһы **3.** *физ.*, *геол.* ҡыуышлыҡ

**СКВА́ЖИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* тишек(ле)-тошоҡ(ло), ҡыуыш(лы); **сква́жистый пол** тишекле-тошоҡло иҙән **2.** *физ.*, *геол.* кәүшәк, көпшәк, ҡыуыш(лы); **сква́жистый грунт** кәүшәк тупраҡ

**СКВА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **сква́жистый** 2

**СКВА́СИТЬ** *сов. что* (*о молоке и т.п.*) асытыу, әсетеү, ойотоу; (*о капусте*) тоҙлау; **сква́сить капу́сту** кәбеҫтә тоҙлау

**СКВА́СИТЬСЯ** *сов.* (*о молоке*) асыу, әсеү, ойоу; (*о капусте*) тоҙланыу; **молоко́ сква́силось** һөт ойоно

**СКВЕР** *м* сквер (*ҡалаларҙағы бәләкәй баҡса*)

**СКВЕ́РНО 1.** *нареч.* насар, яман; **скве́рно себя́ чу́вствовать** үҙеңде насар тойоу **2.** *кому в знач. сказ.*, *безл.* насар, яман, алама, хөрт; **ему́ ста́ло скве́рно** уның хәле насар булып китте

**СКВЕРНОСЛО́В** *м* әшәке һүҙле (телле) кеше, әшәке (әҙәпһеҙ, оятһыҙ) һүҙҙәр менән һүгенеүсе

**СКВЕРНОСЛО́ВИЕ** *с* әшәке (оятһыҙ, әҙәпһеҙ) һүҙҙәр, һүгенеү һүҙҙәре

**СКВЕРНОСЛО́ВИТЬ** *несов.* әшәке (оятһыҙ, әҙәпһеҙ) һүҙ әйтеү, һүгенеү

**СКВЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*мерзкий, гадкий*) насар, яман, әшәке; **скве́рный за́пах** әшәке еҫ; **скве́рный посту́пок** яман эш **2.** *разг.* (*плохого качества, неважный*) насар, хөрт, алама; **скве́рная доро́га** алама юл

**СКВОЗИ́ТЬ** *несов.* **1.** өрөү, үтә өрөү; **ве́тер сквози́т** ел үтә өрә **2.** *безл.* үтәнән-үтә өрөү (һуғыу); **здесь сквози́т** бында үтәнән-үтә өрә **3.** (*просвечивать сквозь отверстия*) үтеп кереү, төшөү; **свет сквози́т че́рез щель** яҡтылыҡ ярыҡтан

төшә **4.** *перен.* (*слегка обнаруживаться*) һиҙелеп (беленеп, сағылып) ҡалыу

**СКВОЗНО́Й,** -ая, -ое **1.** үтәнән-үтә (үтеп) сыҡҡан, үтәнән-үтә; **сквозна́я ра́на** үтәнән-үтә яра; **сквозно́е отве́рстие** үтәнән-үтә тишек **2.** (*без пересадок*) тура, туранан-тура булған; **сквозно́е движе́ние** туранан-тура булған хәрәкәт **3.** (*неплотный, просвечивающий*) үтә (үтәнән-үтә) күренмәле, һирәк; **сквозно́й то́нкий тюль** үтәнән-үтә күренмәле йоҡа селтәр ♦ **сквозно́й ве́тер** үтә ел

**СКВОЗНЯ́К** *м* үтә ел

**СКВОЗЬ** *предлог* и *нареч.* **1.** *предлог с вин. п.* (*употребляется при обозначении предмета, среды, через которые проходит, виднеется что-л.*) арҡыры, аша, үтәләй, үтә; **се́ять сквозь си́то** иләктән иләү; **пробира́ться сквозь толпу́** халыҡ араһынан үтеү **2.** *предлог с вин. п.* (*при обозначении явления, состояния, через которые проступают другие явления; при обозначении действия, которое перемежается или прерывается другим действием*) ҡатыш, аша, аралаш; **смех сквозь слёзы** йәш аралаш көлөү; **услы́шать сквозь сон** йоҡо аралаш ишетеү **3.** *нареч.*; *прост. см.* **наскво́зь** ♦ **сквозь зу́бы говори́ть (бормота́ть)**: 1) аңлайышһыҙ итеп (мығырлап) һөйләү; 2) асыу итеп (ризаһыҙлыҡ белдереп) нимәлер әйтеү; **смотре́ть сквозь ро́зовые очки́** *см.* **ро́зовый**; **смотре́ть сквозь па́льцы** бармаҡ аша ҡарау

**СКВОРЕ́Ц** *м* сыйырсыҡ; **скворе́ц — пти́ца пе́вчая** сыйырсыҡ — һайрар ҡош

**СКВОРЕ́ЧНИК** *м* и **СКВОРЕ́ЧНИЦА** *ж* сыйырсыҡ ояһы

**СКВОРЧО́НОК** *м* сыйырсыҡ балаһы

**СКЕЛЕ́Т** *м* **1.** *анат.* һөлдә; **челове́ческий скеле́т** кеше һөлдәһе; **скеле́т кита́** кит һөлдәһе **2.** *прям., перен.* (*основа, каркас*) нигеҙ, каркас; **железобето́нный скеле́т зда́ния** йорттоң тимербетон каркасы; **скеле́т ро́ли** ролдең каркасы

**СКЕЛЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һөлдә …ы; **скеле́тные мы́шцы** һөлдә ите **2.** *спец.* төп, терәк (таяныс) …ы; **скеле́тные ве́тви я́блони** алмағастың терәк ботаҡтары

**СКЕ́ПСИС** *м см.* **скептици́зм** 2

**СКЕ́ПТИК** *м* **1.** скептик (*скептицизм яҡлы кеше*) **2.** скептик, шиксел, шөбһәләнеп (икеләнеп) ҡараған кеше

**СКЕПТИЦИ́ЗМ** *м* скептицизм (**1.** *объектив ысынбарлыҡты танып белеү мөмкинлеген инҡар иткән идеалистик йүнәлеш* **2.** *һәр нәмәне шик аҫтына алыусанлыҡ, һәр нәмәгә шикләнеп ҡараусанлыҡ*)

**СКЕПТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** скептицизм …ы, скептик; **скепти́ческое направле́ние в филосо́фии** фәлсәфәләге скептицизм йүнәлеш **2.** скептик, шикләнеүсән, ышанмаусан, икеләнеүсән, шөбһәләнеүсән; **скепти́ческий взгляд** скептик ҡараш

**СКЕ́РЦО** *с нескл.*; *муз.* скерцо (*ҙур булмаған музыкаль әҫәр*); **ске́рцо Мендельсо́на** Мендельсон скерцоһы

**СКЕТЧ** *м* скетч (*мәҙәк йөкмәткеле ҡыҫҡа ғына эстрада пьесаһы*)

**СКИДА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* (*сбросать*) ташлау, ырғытыу; **скида́ть до́ски с маши́ны** машинанан таҡталар ырғытыу

**СКИ́ДКА** *ж* **1.** *см.* **скида́ть — ски́дывать**, **ски́нуть — ски́дывать** 1, 3; **2.** ташлама; **прода́жа това́ров со ски́дкой** тауарҙарҙы ташлама менән һатыу; **рабо́тать без ски́док на тру́дности** ҡыйынлыҡтарға ташлама яһамайынса эшләү **3.** *охот.* (*прыжок в сторону с целью запутать следы — о звере*) ҡырын (ситкә) һикереү, сөйләгөү

**СКИ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **скида́ть**, **ски́нуть**

**СКИ́НУТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ташлау, ырғытыу, төшөрөү; **ски́нуть мешо́к на́ пол** токто иҙәнгә төшөрөү; **ски́нуть снег с кры́ши** ҡыйыҡтан ҡар ташлау **2.** *разг.* (*снять надетое*) сисеү, һалыу, һалып ташлау, һалдырыу; **ски́нуть пальто́** пальтоны һалып ташлау **3.** *что, в чём*; *разг.* (*сбавить цену*) кәметеү, төшөрөү; **ски́нуть це́ну** хаҡын төшөрөү **4.** *кого*; *прост.* (*родить раньше срока — о женщине*) төшөрөү; (*о самке животного*) һалыу **5.** *что*; *карт.* ташлау

**СКИ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* сиселеү, төшөү, ысҡынып (сиселеп) төшөү; **ски́нуться с плеч** яурындан төшөү **2.** күмәкләп йыйыу, йыйылышыу, аҡса һалышыу, йыйылышып алып биреү; **ски́нуться на путёвку** йыйылышып путёвка алып биреү

**СКИ́ПЕТР** *м* скипетр (*монархтың хөкөм билдәһе тип һаналған аҫыл таштар менән биҙәлгән семәрле таяғы*)

**СКИПЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (ҡайнай-ҡайнай) ҡуйырып (төйөрләнеп) бөтөү, уҡмашыу **2.** *перен., разг.* (*слежавшись, стать плотным*) (оҙаҡ ятып) ташҡа әйләнеү (ныҡ ҡатыу)

**СКИПИДА́Р** *м* скипидар; **растира́ть те́ло скипида́ром** тәнде скипидар менән ыуыу

**СКИПИДА́РНЫЙ,** -ая, -ое скипидар …ы; **скипида́рное ма́сло** скипидар майы

**СКИРДА́** *ж* и **СКИРД** *м* эҫкерт; **скирда́ соло́мы** һалам эҫкерте; **скла́дывать скирд** эҫкерт һалыу

**СКИРДОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое эҫкертләй торған, эҫкерт …ы; **скирдова́льные ви́лы** эҫкерт һәнәге

**СКИРДОВА́ЛЬЩИК** *м* и **СКИРДОВА́ЛЬЩИЦА** *ж* эҫкерт һалыусы, эҫкертләүсе

**СКИРДОВА́НИЕ** *с см.* **скирдова́ть**; **скирдова́ние се́на** бесән эҫкертләү

**СКИРДОВА́ТЬ** *несов. что* эҫкерткә һалыу, эҫкертләү; **скирдова́ть рожь** арышты эҫкертләү

**СКИРДОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **скирдова́ть**

**СКИРДО́ВКА** *ж*; *разг. см.* **скирдова́ть**

**СКИСА́ТЬ** *несов. см.* **ски́снуть**

**СКИ́СНУТЬ** *сов.* **1.** ойоу, әсеү; **молоко́ ски́сло** һөт әсегән **2.** *перен., разг.* төшөнкөләккә бирелеү, бойоғоу; **что ты скис?** ниңә төшөнкөләккә бирелдең?

**СКИТ** *м* скит (**1.** *аскет монахтар йәшәй торған ҙур булмаған торлаҡ* **2.** *старообрядсылар монастыры йәки ҡасабаһы*)

**СКИТА́ЛЕЦ** *м* и **СКИТА́ЛИЦА** *ж* йөргөнсө, илгиҙәр

**СКИТА́ЛЬЧЕСКИЙ,** -ая, -ое йөргөнсө ...ы, илгиҙәр ...ы; **скита́льческая жизнь** йөргөнсөләр тормошо

**СКИТА́ЛЬЧЕСТВО** *с* ил гиҙеү, күскенселек, сәйәхәт итеү

**СКИТА́НИЕ** *с см.* **скита́ться**

**СКИТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*странствовать*) ил гиҙеү, сәйәхәт итеү, илдән-илгә йөрөү **2.** *разг.* (*не иметь постоянного места жительства, работы*) күсеп йөрөү

**СКИФ I** *м см.* **ски́фы**

**СКИФ II** *м* скиф (*оҙон һәм тар ғына итеп эшләнгән ярыш кәмәһе*)

**СКИ́ФСКИЙ,** -ая, -ое скиф ...ы; **ски́фское иску́сство** скиф сәнғәте

**СКИ́ФЫ** *мн.* (*ед.* **скиф** *м*) скифтар (*яңы эраға тиклем VII—III бб. Ҡара диңгеҙҙең төньяғында йәшәгән төрлө күсмә ҡәбиләләрҙең дөйөм исеме*)

**СКЛАД I** *м*; *в разн. знач.* склад; **склад ору́жия** ҡорал склады; **торго́вый склад** сауҙа склады; **заве́дующий скла́дом** склад мөдире

**СКЛАД II** *м* **1.** төҙөлөш, физик йөҙ; **склад фигу́ры** кәүҙә төҙөлөшө; **склад лица́** йөҙ төҙөлөшө **2.** рәүеш, торош; **склад ума́** аҡыл рәүеше; **душе́вный склад** күңел торошо **3.** (*установившийся порядок*) төҙөлөш, рәүеш; **склад жи́зни** тормош рәүеше **4.** *разг.* (*слаженность*) бәйләнеш, төҙөклөк, ятышлылыҡ ♦ **ни скла́ду ни ла́ду** *см.* **лад**

**СКЛАДИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* складҡа һалыу (урынлаштырыу); **склади́ровать хло́пок** мамыҡты складҡа урынлаштырыу

**СКЛА́ДКА I** *ж* **1.** бөрмә; **ю́бка со скла́дками** бөрмәле итәк **2.** (*прямолинейный сгиб на ткани*) һыр; **брю́ки с отутю́женными скла́дками** һырҙары үтекләнгән салбар **3.** (*морщина на коже, теле*) йыйырсыҡ **4.** (*волнообразный изгиб пластов земной коры*) йыйырсыҡ

**СКЛА́ДКА II** *ж*; *разг. см.* **склад** II 2

**СКЛАДНО́Й,** -ая, -ое асылып-ябылмалы, йыйылып-яҙылмалы, йыйылмалы; **складна́я крова́ть** йыйылмалы карауат ♦ **складно́й нож** бәке

**СКЛА́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* (*стройный*) зифа буйлы, матур кәүҙәле, һомғол; **скла́дный ю́ноша** һомғол егет **2.** (*связный, гладкий — о речи*) шыма, төҙөк, бәйләнешле; **скла́дная речь** шыма телмәр **3.** *разг.* (*хороший, удобный*) яҡшы, уңышлы, ҡулайлы, яйлы; **скла́дные сапо́жки** яйлы итек

**СКЛА́ДОЧНЫЙ I,** -ая, -ое склад ...ы, склад итеп тотолған; **скла́дочный пункт** склад пункты; **скла́дочное помеще́ние** склад итеп тотолған бина

**СКЛА́ДОЧНЫЙ II,** -ая, -ое *уст.* күмәк кешенән йыйылған; **скла́дочное иму́щество** күмәк кешенән йыйылған мөлкәт

**СКЛАДСКО́Й,** -ая, -ое склад ...ы; **складски́е рабо́чие** склад эшселәре

**СКЛА́ДЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** бөрмәле; **скла́дчатая ю́бка** бөрмәле итәк **2.** *геол.* йыйырсыҡлы, йыйырсыҡланып торған; **скла́дчатые го́рные це́пи** йыйырсыҡлы тау теҙмәләре

**СКЛА́ДЧИНА** *ж* аҡса (әйбер) һалышыу; **купи́ть в скла́дчину** *что-л. нимәлер* аҡса һалышып һатып алыу

**СКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **сложи́ть** 1—5

**СКЛА́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сложи́ться** **2.** *страд. от* **скла́дывать**

**СКЛЕВА́ТЬ** *сов. что* суҡып (сүпләп) ашап бөтөрөү; (*о рыбе*) сиртеү, сиртеп ашау

**СКЛЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **склева́ть**

**СКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **скле́ить**

**СКЛЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **скле́иться** **2.** *страд. от* **скле́ивать**

**СКЛЕ́ИТЬ** *сов. что* **1.** йәбештереп яһау, елемләп йәбешетереү; **скле́ить листы́ бума́ги** ҡағыҙ биттәрен елемләп йәбештреү **2.** *кого-что*; *перен.* (*устроить, наладить*) яйлау, рәтләү, көйләү

**СКЛЕ́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*слипнуться*) йәбешеү **2.** *перен., разг.* (*наладиться, устроиться*) яйланыу, рәтләнеү, көйләнеү

**СКЛЕ́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **скле́ить — скле́ивать**; **скле́йка фане́ры** фанер йәбештереү **2.** (*место*) йәбештерелгән урын

**СКЛЕП** *м* төрбә, кәшәнә (*табут ҡуйыу өсөн ер аҫтына ҡаҙып яһалған махсус бина*)

**СКЛЕПА́ТЬ** *сов. что* сүкеп ялғау (беркетеү, тоташтырыу), сигәләү, сигәләп ялғау; **склепа́ть желе́зные листы́** ҡалайҙарҙы сигәләп ялғау

**СКЛЕПА́ТЬСЯ** *сов.* сүкеп ялғаныу (беркетелеү, тоташтырылыу), сигәләп ялғаныу

**СКЛЁПКА** *ж* **1.** *см.* **склепа́ть — склёпывать** **2.** (*место*) сигәләп ҡуйылған урын, сүкеп ялғанған ер

**СКЛЁПЫВАТЬ** *несов. см.* **склепа́ть**

**СКЛЁПЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **склепа́ться** **2.** *страд. от* **склёпывать**

**СКЛЕ́РА** *ж*; *анат.* күҙ ағы

**СКЛЕРО́З** *м* склероз (*төрлө ағзаларҙың йәки туҡыманың тығыҙланып ҡатыуынан килгән ауырыу*); **склеро́з сосу́дов** ҡан тамырҙары склерозы; **склеро́з се́рдца** йөрәк склерозы

**СКЛЕРО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое склероз ...ы; **склеро́зное явле́ние** склероз күренеше

**СКЛЕРО́МЕТР** *м* склерометр (*металл һәм минералдарҙың ҡатылығын үлсәй торған ҡорамал*)

**СКЛЕРО́ТИК** *м*; *разг.* склеротик (*склероз менән ауырыған кеше*)

**СКЛЕРОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое склеротик, склероз …ы (*склероз менән ауырыған*); **склероти́ческий проце́сс** склероз процесы

**СКЛИ́КАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* саҡырыу, саҡырып (өндәшеп) йыйыу, ҡысҡырып саҡырыу (өндәшеү); **скли́кать цыпля́т** себештәрҙе саҡырыу

**СКЛИКА́ТЬ** *несов. см.* **скли́кать**

**СКЛО́КА** *ж* ыҙғыш, талаш, ғауға, дәғүәләшеү

**СКЛОН** *м* һөҙәклек, бит, битләү, ҡашлаҡ, иркен, ҡабырға; **склон горы́** тау бите ♦ **на скло́не лет (жи́зни, дней)** ҡартлыҡ көнөндә

**СКЛОНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **склони́ть** — **склоня́ть** **2.** *грам.* килеш менән үҙгәреш; **склоне́ние существи́тельных** исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше ♦ **магни́тное склоне́ние**; **склоне́ние магни́тной стре́лки** *физ.* магнит ауышыуы

**СКЛОНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*нагнуть*) эйеү, ауыштырыу, бөгөү, һалындырыу; **склони́ть го́лову** башты эйеү; **склони́ть знамёна** байраҡтарҙы һалындырыу **2.** *кого-что*; *перен.* (*расположить к себе*) үҙ яғына ауҙарыу (тартыу), йәлеп итеү **3.** *к чему, на что*; *перен.* (*убедить согласиться на что-л.*) (өндәп) күндереү, (димләп) ризалатыу; **склони́ть к побе́гу** ҡасырға күндереү ♦ **склони́ть го́лову** *перед кем-чем*; *высок.*: 1) буйһоноу, үҙеңде еңелгән һанау, башты эйеү; 2) ихтирам белдереү, баш эйеү

**СКЛОНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*нагнуться*) эйелеү, бөгөлөү, эйелеп (бөгөлөп, һалынып) төшөү; **ве́тки склони́лись над водо́й** ботаҡтар һыуға һалынып төшкән **2.** *к чему, на что* ауышыу, күсеү; **день склони́лся к ве́черу** көн кискә ауышты **3.** йүнәлеш алыу, күсеү; **склони́ться на сто́рону наро́да** халыҡ яғына күсеү **4.** *к чему, на что*; *перен.* (*согласиться, поддавшись уговорам*) күнеү, ауыу, риза булыу, ризалашыу; **склони́ться к но́вому реше́нию** яңы ҡарарға риза булыу

**СКЛО́ННОСТЬ** *ж* **1.** әүәҫлек, һәләтлек, күңел ятыу, йән тартыу, әүәҫ булыу, бирелеүсәнлек; **скло́нность к нау́чной рабо́те** ғилми эшкә әүәҫлек; **скло́нность к чте́нию** уҡыуға әүәҫлек **2.** (*предрасположенность*) -ға/-гә бирешеүсәнлек, тиҙ генә -ып/-еп барыу; **скло́нность к полноте́** тиҙ генә һимереп барыу

**СКЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *к чему* әүәҫ, яратыусан, мауығыусан; **скло́нный к нау́чным заня́тиям** ғилми эшкә әүәҫ **2.** -ға/-гә бирешеүсән (тартым), тиҙ генә -ып/-еп барған; **скло́нный к боле́зням** тиҙ генә ауырып барған **3.** *к чему* и *с неопр.* -ға/-гә әҙер (әҙер булған); **он скло́нен согласи́ться** ул ризалашырға әҙер

**СКЛОНЯ́ЕМОСТЬ** *ж*; *грам.* килеш менән үҙгәреүсәнлек

**СКЛОНЯ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **склоня́ть** **2.** *прил.*; *грам.* килеш менән үҙгәрә торған

**СКЛОНЯ́ТЬ** *несов. что* **1.** *см.* **склони́ть** **2.** *что*; *грам.* килеш менән үҙгәртеү **3.** *кого-что*; *перен., разг.* йыш телгә алыу, сәйнәү, әнәһенән-ебенә тиклем тикшереү; **его́ склоня́ют на всех собра́ниях** уны йыйылыш һайын телгә алалар ♦ **склоня́ть по всем падежа́м (во всех падежа́х)** *см.* **склоня́ть** 3

**СКЛОНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **склони́ться** **2.** *грам.* килеш менән үҙгәреү **3.** *страд. от* **склоня́ть**

**СКЛО́ЧНИК** *м* и **СКЛО́ЧНИЦА** *ж*; *разг.* ғауғасы, яныялсы, ара боҙоусы

**СКЛО́ЧНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ғауға (бола) ҡуптарыу, талаш (янъял) сығарыу, ыҙғышыу, ара боҙоу

**СКЛО́ЧНИЧЕСТВО** *с*; *разг.* ғауғасыллыҡ, янъялсыллыҡ

**СКЛО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** ғауғалы, ыҙышыҙғылы; **скло́чные отноше́ния** ғауғалы мөнәсәбәттәр **2.** ғауғасыл, дәғүәсел, бәләсел; **скло́чный челове́к** ғауғасыл кеше

**СКЛЯ́НКА I** *ж*; *разг.* ваҡ (бәләкәй) шешә

**СКЛЯ́НКА II** *ж*; *мор.* **1.** склянка (*диңгеҙҙә ярты сәғәтлек ваҡыт*) **2.** *мн.* **скля́нки** ҡом сәғәте (*карантарҙа*)

**СКОБА́** *ж* **1.** тотҡа, тотҡос; **желе́зная скоба́** тимер тотҡос **2.** атлама, беркеткес, нығытҡыс; **скрепи́ть брёвна скоба́ми** бүрәнәләрҙе атлама менән беркетеү

**СКО́БЕЛЬ** *м* һыҙырғыс, тырнаҡ йышҡы, ҡырғы; **строга́ть ско́белем** ҡырғы менән йышыу

**СКО́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йышҡы …ы; **ско́бельные ру́чки** йышҡы тотҡаһы

**СКО́БКА** *ж* **1.** *см.* **скоба́** **2.** *мн.* **ско́бки**; *грам., мат.* йәйә; **квадра́тные ско́бки** квадрат йәйәләр; **кру́глые ско́бки** түңәрәк йәйәләр; **откры́ть ско́бки** йәйәләрҙе асыу ♦ **в ско́бку (стричь)** сәсте түңәрәк итеп алыу; **сказа́ть в ско́бках** һүҙ араһында ғына әйтеп (иҫкә төшөрөп) китеү

**СКОБЛЕ́НИЕ** *с см.* **скобли́ть**; **скобле́ние коры́** ҡабыҡты ҡырып таҙартыу

**СКОБЛИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡыра (йыша) торған, ҡырғыс, йышҡыс; **скобли́льная маши́на** ҡырғыс машина

**СКОБЛИ́ТЬ** *несов. что* ҡырыу, ҡырып таҙартыу (эшкәртеү); **скобли́ть стол ножо́м** өҫтәлде бысаҡ менән ҡырып таҙартыу; **скобли́ть овчи́ну** һарыҡ тиреһен ҡырып эшкәртеү

**СКОБЯНО́Й,** -ая, -ое тимер-томорҙан эшләнгән, тимер-томор …ы; **скобяно́й магази́н** тимер-томор магазины

**СКО́ВАННОСТЬ** *ж* **1.** ирекле (иркен) булмау; **ско́ванность движе́ний** хәрәкәттәрҙең иркен булмауы **2.** оялсанлыҡ, тартыныусанлыҡ

**СКО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **скова́ть** **2.** *прил.*; *перен.* (*лишённый свободы, лёгкости, непринуждённости*) ирекле (иркен) булмаған, тотҡарлыҡлы; **ско́ванные движе́ния** тотҡарлыҡ-

лы хәрәкәттәр **3.** *прил.* тартынып (уңайһыҙланып, оялып) тороусан, оялсан, тартыныусан; **ско́ванная девчо́нка** оялсан ҡыҙыҡай

**СКОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*выковать*) сүкеп (һуғып) яһау, һуғыу, сүкеү; **скова́ть подко́ву** даға һуғыу; **скова́ть гвоздь** ҡаҙаҡ сүкеү **2.** (*соединить ковкой*) сүкеп беркетеү (ялғау, тоташтырыу), тапап ялғау; **скова́ть листы́ желе́за** тимер табаҡтарын сүкеп тоташтырыу **3.** *перен.* (*сплотить*) берләштереү, ныҡ яҡынайтыу; **скова́ть люде́й** кешеләрҙе берләштереү **4.** *кого-что* (*надеть оковы*) бығаулау, бығау һалыу; **скова́ть заключённых** тотҡондарға бығау һалыу **5.** *перен.* (*лишить свободы, активности*) тотҡарлау, ирек бирмәү; **скова́ть си́лы проти́вника** дошмандың көстәрен тотҡарлау **6.** *что*; *перен.* (*оковать*) боҙ менән ҡаплау, (ныҡ итеп) туңдырыу; **моро́з скова́л ре́ку** һыуыҡ йылғаны туңдырҙы

**СКОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** сүкелеү, сүкелеп берегеү (тоташыу) **2.** *перен.* боҙ менән ҡапланыу, туңыу; **о́зеро скова́лось льдом** күл боҙ менән ҡапланды

**СКОВОРОДА́** *ж* таба; **алюми́ниевая сковорода́** алюмин таба; **жа́рить на сковороде́** табала ҡыҙҙырыу

**СКОВОРО́ДНИК** *м* табағас, ҡыҫҡыс

**СКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **скова́ть** 2—6

**СКОВЫ́РИВАТЬ** *несов. см.* **сковырну́ть**

**СКОВЫРНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* соҡоп (тырнап) алыу (сығарыу); **сковырну́ть боля́чку** һыҙлауыҡты соҡоп алыу **2.** *прост.* (*столкнуть*) төртөп төшөрөү **3.** *перен.* (*прогнать*) йыҡып (бәреп) төшөрөү

**СКОК I** *м* **1.** *см.* **скака́ть** 2; **2.** *в знач. нареч.* **ско́ком**; *разг.* елдереп, сабып, саптырып; **нести́сь ско́ком** елдереп барыу ♦ **во весь скок** йәнфарман сабыу (*атҡа ҡарата*)

**СКОК II** *в знач. сказ.*; *разг. см.* **скака́ть**; **с пола́тей скок** һәндерәнән һикереп төшөү

**СКОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **сколоти́ть**

**СКОЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сколоти́ться 2.** *страд. от* **скола́чивать**

**СКО́ЛОК** *м* **1.** ярсыҡ, китек; **ско́лок льда** боҙ ярсығы **2.** *спец.* (*наколотый узор*) сәнселмә биҙәк

**СКОЛОТИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*сбить, соединить вместе*) ҡағыу, ҡағып-һуғып нығытыу (беректереү); **сколоти́ть полови́цы** иҙән таҡтаһын ҡағып-һуғып нығытыу **2.** *что* ҡаҡҡылап-һуҡҡылап эшләү (әтмәләү, яһау); **сколоти́ть скаме́йку** ҡаҡҡылап-һуҡҡылап эскәмйә әтмәләү **3.** *кого-что*; *перен., разг.* ойоштороу, ҡороу, йыйыу, туплау; **сколоти́ть акти́в** актив туплау **4.** *что*; *перен., разг.* (*накопить*) йыйыу, туплау, йүнәтеү (*аҡсаға ҡарата*); **сколоти́ть миллио́н** миллион туплау

**СКОЛОТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡағылып-һуғылып берегеү (тоташыу, нығыныу) **2.** *перен., разг.* (*собраться, создаться — о коллективе*) ойошоу, тупланыу; **сколоти́лся дру́жный коллекти́в** берҙәм коллектив тупланды **3.** *перен., прост.* (*собраться, скопиться — о деньгах*) тупланыу, йыйылыу; **скопи́лась больша́я су́мма де́нег** байтаҡ ҡына аҡса йыйылды **4.** *разг.* (*под ударами отделиться от чего-л.*) ҡағылып-һуғылып төшөү

**СКОЛО́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡуптарыу, ватыу; **ло́мом сколо́ть лёд** боҙҙо лом менән ҡуптарыу **2.** (*соединить, прикалывая чем-л.*) ҡаҙап (сәнсеп) тоташтырыу, ҡаҙап (сәнсеп) ҡуйыу; **сколо́ть ле́нты була́вкой** таҫмаларҙы төйрәмес менән ҡаҙап ҡуйыу

**СКОЛО́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*отделиться*) ҡубыу, ҡубып сығыу (төшөү); **лёд сколо́лся** боҙ ҡупты **2.** (*соединиться прикалыванием*) ҡаҙалыу, ҡаҙап ҡуйылыу

**СКОЛЬ** *нареч.* **1.** *книжн.* (*насколько*) күпме, ни тиклем, ҡанса; **сколь возмо́жно** күпме мөмкин **2.** *в качестве союзного слова в придаточных предложениях*; *книжн.* күпме, мөмкин тиклем, ни тиклем, мөмкин булғанса **3.** *обл. см.* **ско́лько**

**СКОЛЬЖЕ́НИЕ** *с см.* **скользи́ть**

**СКОЛЬЗИ́ТЬ** *несов.* **1.** шыуыу, шыуып барыу (төшөү, тороу); **скользи́ть по льду** боҙ өҫтөнән шыуыу; **скользи́ть из рук** ҡулдан шыуып төшөү **2.** тайыу; **но́ги скользя́т** аяҡ тая **3.** *перен.* (*легко, плавно двигаться*) бәүелеү сайҡалыу, шыуыу, һалмаҡ ҡына (йөҙөп) барыу; **ло́дка скользи́т по волна́м** кәмә тулҡындар өҫтөндә сайҡала **4.** *перен.* (*о взгляде*) күҙ йөрөтөү, күҙ йүгертеп сығыу; **скользи́ть глаза́ми по стро́чкам** юлдар буйлап күҙ йүгертеп сығыу

**СКО́ЛЬЗКИЙ,** -ая, -ое **1.** тайғаҡ, шыйғаҡ, тайғалаҡ, шыйғалаҡ; **ско́льзкий парке́т** тайғаҡ паркет; **ско́льзкие ступе́ни** тайғаҡ баҫҡыстар **2.** *перен.* (*ненадёжный, опасный*) ышанысһыҙ, тотороҡһоҙ, ҡурҡыныс, тайғаҡ; **ступи́ть на ско́льзкий путь** ышанысһыҙ юлға баҫыу **3.** *перен.* (*двусмысленный, сомнительный*) шикле, сәйер, ҡыйын; **ско́льзкая те́ма** сәйер тема; **ско́льзкое положе́ние** ҡыйын хәл

**СКОЛЬЗНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **скользи́ть 2.** (*слегка прикоснуться к чему-л.*) һыҙырып (тейеп) үтеү; **пу́ля скользну́ла по ребру́** пуля ҡабырғаны һыҙырып үткән **3.** (*быстро скрыться*) ялт итеп (тиҙ генә) үтеп китеү, ялт итеп (тиҙ генә) инеп китеү; **скользну́ть в дверь** ялт итеп ишектән инеп китеү

**СКОЛЬЗЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **скользи́ть 2.** *прил.* шыума, шыумалы; **скользя́щий по́ршень** шыумалы поршень **3.** *прил.* (*плавный, лёгкий — о движениях, походке*) һалмаҡ, еңел, талғын; **скользя́щие шаги́** еңел аҙымдар **4.** *прил.* (*меняющийся*) үҙгәреүсән, үҙгәрмәле, даими булмаған; **скользя́щие тари́фы** үҙгәреүсән тарифтар

**СКО́ЛЬКО** *мест.* и *нареч.* **1.** *мест.* и *нареч.* күпме, нисә; **ско́лько сто́ит?** күпме тора?; **ско́лько вре́мени?** ваҡыт (сәғәт) нисә? **2.** *мест.* и *нареч.* (*как много*) күпме, ни хәтле, ни тиклем, ни

ҡәҙәр, ни саҡлы; **ско́лько вре́мени потеря́ли!** ни ҡәҙәр ваҡытты әрәм иттек! **3.** *нареч.* (*насколько*) -са/-сә; **ско́лько по́мню, он всегда́ был весёлым** хәтерләүемсә, ул һәр ваҡыт шулай күңелсәк ине ♦ **ско́лько душе́ уго́дно** теләгән ҡәҙәр (тиклем), йәнең күпме теләй; **ско́лько лет, ско́лько зим!** күпме ғүмер үткән!, әллә ҡасан!; **ско́лько мо́жно!** күпме түҙергә мөмкин!

**СКО́ЛЬКО-НИБУДЬ** *мест.* и *нареч.* бер ни тиклем (ҡәҙәр), бер аҙ, әҙерәк, әҙме-күпме; **вы́слать ско́лько-нибудь де́нег** бер аҙ аҡса ебәреү

**СКО́ЛЬКО-ТО** *мест.* и *нареч.* күпмелер; **дать ско́лько-то де́нег** күпмелер аҡса биреү

**СКОМА́НДОВАТЬ** *сов. что* **1.** команда биреү **2.** *разг.* (*распорядиться*) ҡушыу, бойороу

**СКОМБИНИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **комбини́ровать** 1

**СКО́МКАТЬ** *сов. что* **1.** йомарлау, бөгәрләү, уҡмаштырыу, йомарлап (бөгәрләп, уҡмаштырып) бөтөү; **ско́мкать бума́гу** ҡағыҙҙы йомарлау **2.** *перен.* ашыҡ-бошоҡ этмәләп ҡуйыу, ашыҡ-бошоҡ эшләп ҡуйыу; **ско́мкать коне́ц по́вести** повестың аҙағын ашыҡ-бошоҡ этмәләп ҡуйыу

**СКО́МКАТЬСЯ** *сов.* бөгәрләнеү, йомарланыу, таушалыу, уҡмашыу, бөгәрләнеп (йомарланып, таушалып, уҡмашып) бөтөү; **оде́жда ско́мкалась** кейем таушалып бөткән

**СКОМОРО́Х** *м* **1.** скоморох (*Боронғо Рус та ил гиҙеп, кәмит күрһәтеп йөрөүсе*) **2.** *разг.* көлдөрөүсе (мәҙәксе) кеше

**СКОМОРО́ШНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* көлдөрөү, мәҙәк күрһәтеү

**СКОМПЛЕКТОВА́ТЬ** *сов. см.* **комплектова́ть** 1; **скомплектова́ть газе́ты** гәзиттәрҙе комплектлау

**СКОМПОНОВА́ТЬ** *сов. см.* **компонова́ть**; **скомпонова́ть нау́чную статью́** ғилми мәҡәлә төҙөү

**СКОМПРОМЕТИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* хурлыҡҡа ҡалдырыу, яманатлы итеү, уңайһыҙ хәлгә ҡалдырыу, яманатын (данын) сығарыу

**СКОНСТРУИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **конструи́ровать**; **сконструи́ровать маши́ну** машинаның конструкцияһын төҙөү

**СКОНФУ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сконфу́зить 2.** *прил.* оялып ҡаушаған, уңайһыҙланған, тартынған; **сконфу́женное лицо́** оялыштан ҡаушаған йөҙ

**СКОНФУ́ЗИТЬ** *сов. см.* **конфу́зить**

**СКОНФУ́ЗИТЬСЯ** *сов. см.* **конфу́зиться**

**СКОНЦЕНТРИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **концентри́ровать** 1, 2; **сконцентри́ровать войска́** ғәскәр туплау; **сконцентри́ровать внима́ние** иғтибарҙы йүнәлдереү

**СКОНЦЕНТРИ́РОВАТЬСЯ** *сов. см.* **концентри́роваться** 1, 2

**СКОНЧА́НИЕ** *с*; *разг.*, *уст.* **1.** аҙаҡ, һуң, ахыр **2.** (*смерть*) үлем, вафат ♦ **до сконча́ния ве́ка** *разг.* мәңгегә, мәңгелеккә, ғүмергә

**СКОНЧА́ТЬСЯ** *сов.* вафат булыу, донъя ҡуйыу, гүр эйәһе булыу, үлеү

**СКОПА́** *ж* ҡәлмәргән, балыҡсы ҡарсыға

**СКОПА́ТЬ** *сов. что* ҡағып (соҡоп) алып ташлау, ҡаҙып тигеҙләү; **скопа́ть ко́чку** түмгәкте ҡаҙып алып ташлау

**СКОПЕ́Ц** *м* **1.** бестерелгән (ир) кеше **2.** *мн.* **скопцы́** скопецтар (*Рәсәйҙә XVIII б. аҙағында барлыҡҡа килгән дини секта*)

**СКОПИДО́М** *м* и **СКОПИДО́МКА** *ж*; *разг.* саманан тыш һаҡсыл кеше, һаран (һыҡмыр) кеше

**СКОПИДО́МНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* үтә (саманан тыш) һаранланыу (һыҡмырланыу)

**СКОПИДО́МСТВО** *с* үтә (саманан тыш) һаранлыҡ, һыҡмырлыҡ

**СКОПИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **копи́ровать**; **скопи́ровать взро́слых** ололар булып ҡыланыу

**СКОПИ́ТЬ** *сов. что* йыйыу, туплау; **скопи́ть де́нег** аҡса йыйыу

**СКОПИ́ТЬСЯ** *сов.* йыйылыу, тупланыу, күмәкләшеп (өйөлөшөп) тороу

**СКО́ПИЩЕ** *с* халыҡ төркөмө, төркөм, өйөр

**СКОПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **скопи́ть** — **скопля́ть**, **скопи́ться** — **скопля́ться 2.** (*большое количество кого-чего-л.*) өйкөм, төркөм, тупланма; **скопле́ние войск** ғәскәрҙәр тупланмаһы

**СКОПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **скопи́ть**

**СКОПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **скопи́ться 2.** *страд. от* **скопля́ть**

**СКО́ПОМ** *нареч.*; *разг.* бергәләп, бергәләшеп, күмәкләшеп, барыһы (һәммәһе) бергә; **весь наро́д ско́пом** барлыҡ халыҡ бергәләп

**СКОРБЕ́ТЬ** *несов. о ком-чём*; *высок.* көйөү, ҡайғырыу, хәсрәтләнеү, ауыр ҡайғы (хәсрәт) кисереү; **скорбе́ть о ги́бели бли́зких** яҡындарының үлгәненә ҡайғырыу

**СКО́РБНЫЙ,** -ая, -ое көйөнөслө, ҡайғылы, хәсрәтле; **ско́рбная весть** ҡайғылы хәбәр; **ско́рбное лицо́** ҡайғылы йөҙ

**СКОРБУ́Т** *м*; *мед.* зәңге (*ауырыу*)

**СКОРБУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое *мед.* зәңге ...ы; **скорбу́тная о́пухоль** зәңге шеше

**СКОРБЬ** *ж* көйөк, ҡайғы, хәсрәт; **глубо́кая скорбь** тәрән ҡайғы

**СКОРЕ́Е 1.** *сравн. ст. от* **ско́рый** и **ско́ро**; тиҙерәк, йәһәтерәк, шәберәк **2.** *вводн. сл.* (*вернее, точнее*) дөрөҫөрәге, ысыны ♦ **скоре́е всего** *в знач. вводн. сл.* шулайҙыр, моғайын; **скоре́е ..., не́жели (чем)** *в знач. союза* башлыса, -рға/-рғә ҡарағанда

**СКОРЛУПА́** *ж* **1.** ҡабыҡ; **скорлупа́ оре́ха** сәтләүек ҡабығы; **яи́чная скорлупа́** йомортҡа ҡабығы **2.** *перен.* (*то, что ограничивает, мешает действовать, развиваться*) эс, кәртә, ҡабыҡ ♦ **пря́таться в свою́ скорлупу́** үҙ ҡабығыңа бикләнеү

**СКОРМИ́ТЬ** *сов. кого-что* ашатып бөтөрөү; **скорми́ть се́но скоту́** бесәнде малға ашатып бөтөрөү

**СКОРНЯ́ЖИТЬ** *несов. см.* **скорня́жничать**

**СКОРНЯ́ЖНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* тире иләү (эшкәртеү), тире иләүсе (эшкәртеүсе) булып эшләү, тире иләү (эшкәртеү) менән шөғөлләнеү

**СКОРНЯ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое тире иләү (эшкәртеү) ...ы; **скорня́жное де́ло** тире иләү эше

**СКОРНЯ́К** *м* тире иләүсе (эшкәртеүсе)

**СКО́РО 1.** *нареч.* тиҙ, шәп, йәһәт, етеҙ, ҡыҙыу; **сде́лать о́чень ско́ро** бик тиҙ эшләү **2.** *нареч.* тиҙҙән, оҙаҡламай, бер аҙҙан; **ско́ро увидимся** оҙаҡламай күрешербеҙ **3.** *в знач. сказ.* тиҙҙән, оҙаҡламай, бер аҙҙан; **ско́ро ночь** тиҙҙән төн

**СКОРОВА́РКА** *ж* скороварка (*тиҙ бешерә торған кәстрүл*)

**СКОРОГОВО́РКА** *ж* **1.** (*быстрая речь*) тиҙ (ҡыҙыу) телмәр **2.** (*шуточный жанр народного творчества, основанный на труднопроизносимом сочетании слов*) телкөрмәүес, тиҙәйткес, һүҙ уйнатыу

**СКОРО́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тыйылған, итле (һөтлө) аҙыҡ (*христиан дине буйынса пост ваҡытында ашарға ярамаған*); **скоро́мная пи́ща** тыйылған аҙыҡ **2.** *в знач. сущ.* **скоро́мное** *с* итле (һөтлө) ашамлыҡ

**СКОРОПАЛИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж*; *разг.* үтә ашығыслыҡ, йәһәтлек, ҡабаланлыҡ, уйламай эшләгәнлек; **скоропали́тельность реше́ния** ҡарарҙың ҡабаланлығы

**СКОРОПАЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* үтә ашығыс (ҡабалан), бик йәһәт, уйлап еткерелмәгән; **скоропали́тельное реше́ние** үтә ашығыс сығарылған ҡарар

**СКО́РОПИСЬ** *ж* тиҙ (йүгерек) яҙыу

**СКОРОПО́РТЯЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся тиҙ боҙола торған; **скоропо́ртящиеся проду́кты** тиҙ боҙола торған аҙыҡтар

**СКОРОПОСТИ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое ҡапыл, кинәт, аңғармаҫтан, көтмәгәндә; **скоропости́жная смерть** ҡапыл үлеү

**СКОРОПРЕХОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее *книжн.* тиҙ үтеп китеүсән (китә торған); **скоропреходя́щее сча́стье** тиҙ үтеп китә торған бәхет

**СКОРОСПЕ́ЛКА** *разг.* **1.** *ж* иртә (тиҙ) өлгөрөүсән, иртә (тиҙ) өлгөрә торған, иртә (тиҙ) бешкән (*емеш, йәшелсә*); **карто́шка-скороспе́лка** иртә өлгөрә торған картуф **2.** *м* и *ж*; *перен.* (*о человеке*) өлгөр, тиҙ буйға еткән

**СКОРОСПЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** тиҙ (иртә) өлгөрә (етешә) торған (бешкән); **скороспе́лая гру́ша** тиҙ өлгөрә торған армыт **2.** *перен.*, *разг.* ҡабалан, ашығыс, уйлап еткерелмәгән, өлгөрөп етмәгән, сейле-бешле; **скороспе́лый вы́вод** ашығыс һығымта **3.** (*о человеке*) өлгөрөп еткән; **скороспе́лый поэт** өлгөрөп еткән шағир

**СКОРОСТНИ́К** *м* и **СКОРОСТНИ́ЦА** *ж* **1.** шәп йөрөүсе (осоусы һ.б.); **лы́жник-скоростни́к** шәп йөрөүсе саңғысы; **лётчик-скоростни́к** шәп осоусы лётчик **2.** йәһәт, тиҙ, шәп (*эшләүсе, башҡарыусы һ.б.*); **сталева́р-скоростни́к** ҡоросто тиҙ ҡайнатыусы

**СКОРОСТНО́Й,** -ая, -ое **1.** тиҙлек ...ы; **скоростно́й режи́м** тиҙлек режимы **2.** тиҙ (шәп) осоусы (йөрөүсе), тиҙ (шәп) оса (йөрөй) торған, тиҙләтелгән; **скоростно́й самолёт** шәп оса торған самолёт; **скоростна́я пла́вка** тиҙләтелгән иретеү

**СКОРОСТРЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *воен.* тиҙ (йыш, шәп) ата торған; **скоростре́льная пу́шка** йыш ата торған туп

**СКО́РОСТЬ** *ж*; *в разн. знач.* тиҙлек, йәһәтлек; **ско́рость све́та** яҡтылыҡ тиҙлеге; **ско́рость зву́ка** тауыш тиҙлеге; **ско́рость тече́ния** ағым тиҙлеге; **ско́рость полёта** осоу тиҙлеге; **сре́дняя ско́рость** уртаса тиҙлек; **едини́ца ско́рости** тиҙлек берәмеге; **ско́рость ре́зания мета́лла** металл киҫеү тиҙлеге

**СКОРОСШИВА́ТЕЛЬ** *м* (*папка*) ҡағыҙ беркеткес

**СКОРОТА́ТЬ** *сов. что* үткәреү, уҙғарыу, үткәреп (уҙғарып) ебәреү

**СКОРОТЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* тиҙ үтеүсән (үтә торған), тиҙ үтеп китә торған, ҡыҫҡа ваҡытлы; **скороте́чная мо́лодость** тиҙ үтеүсән йәшлек ♦ **скороте́чная чахо́тка** *уст.* тиҙ көсәйеүсән үпкә ауырыуы

**СКОРОХО́Д** *м*; *разг.* шәп йөрөүсе (йүгереүсе) кеше; **конькобе́жец-скорохо́д** *спорт.* конькиҙа шәп йөрөүсе кеше ♦ **сапоги́-скорохо́ды** тылсымлы итек

**СКОРОХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое шәп йөрөшлө, шәп йөрөй торған; **скорохо́дное су́дно** шәп йөрөй торған судно

**СКОРПИО́Н** *м* **1.** *зоол.* саян **2.** *астр.* Саян (*йондоҙлоҡ*)

**СКОРПИО́НИЙ,** -ья, -ье саян ...ы; **скорпио́нье жа́ло** саян ҡаяуы; **скорпио́ний яд** саян ағыуы

**СКОРРЕКТИ́РОВАТЬ** *несов. см.* **корректи́ровать** 1; **скорректи́ровать статью́** мәҡәләгә төҙәтмә индереү

**СКО́РЧИТЬ** *сов. см.* **ко́рчить** 1

**СКО́РЧИТЬСЯ** *сов. см.* **ко́рчиться**; **ско́рчиться от бо́ли** ауыртыуҙан тартышыу

**СКО́РЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*быстрый*) йәһәт, тиҙ, етеҙ, шәп, ҡыҙыу; **ско́рая езда́** етеҙ йөрөү; **ско́рые шаги́** ҡыҙыу аҙымдар **2.** (*передвигающийся с большой скоростью*) тиҙ йөрөшлө; **ско́рый по́езд** тиҙ йөрөшлө поезд **3.** (*близкий по времени*) яҡын, тиҙ; **в ско́ром вре́мени** яҡын арала ♦ **на ско́рую ру́ку** тиҙ генә, ашыҡ-бошоҡ; **ско́рая по́мощь**: 1) ашығыс медицина ярҙамы; 2) ашығыс медицина ярҙамы машинаһы

**СКОСИ́ТЬ I** *сов.* **1.** *что* сабыу, сабып алыу (бөтөрөү); **скоси́ть рожь** арышты сабып алыу **2.** *кого-что*; *перен.* (*убить, погубить*) ҡырып (үлтереп) бөтөү, күпләп ҡырыу

**СКОСИ́ТЬ II 1.** (*сделать косым*) ҡыйшайтыу, ҡыйыш итеү, ҡыйып ебәреү; **скоси́ть поло́тнище при кро́йке** бескәндә тауарҙы ҡыйып ебә-

реү **2.** салыш (ҡыйыш) итеү, салшайтыу, ҡыйшайтыу; **скоси́ть глаза́** күҙҙәрҙе салшайтыу; **скоси́ть рот** ауыҙҙы ҡыйшайтыу

**СКОСИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*покривиться, стать косым*) ҡыйшайыу, ҡыйыш булыу; **дом скоси́лся** йорт ҡыйшайған **2.** *разг.* (*скосить глаза на кого-что-л.*) салшайтып (ҡырын) ҡарау

**СКОТ** *м* **1.** *собир.* мал, мал-тыуар; **ме́лкий скот** ваҡ мал; **кру́пный рога́тый скот** мөгөҙлө эре мал; **ме́лкий рога́тый скот** мөгөҙлө ваҡ мал **2.** *презр., прост.* (*о грубом человеке*) хайуан

**СКОТИ́НА** *ж* **1.** *собир.* мал, мал-тыуар **2.** (*об отдельном животном*) мал, хайуан **3.** *прост., презр. см.* **скот** 2

**СКО́ТНИК** *м* **1.** малсы, мал ҡараусы; **рабо́тать ско́тником** мал ҡараусы булып эшләү **2.** *разг.* (*помещение*) мал ҡураһы (аҙбары)

**СКО́ТНИЦА** *ж* **1.** *см.* **ско́тник** 1; **2.** *разг. см.* **ско́тник** 2; **ремонти́ровать ско́тницу** мал ҡураһын ремонтлау

**СКО́ТНЫЙ,** -ая, -ое мал ...ы, мал ҡураһы

**СКОТО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "мал" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **скотоба́за** мал базаһы

**СКОТОБО́ЕЦ** *м* мал һуйыусы

**СКОТОБО́ЙНЯ** *ж* мал һуйыу урыны

**СКОТОВО́Д** *м* малсы, мал ҡараусы (үрсетеүсе, аҫыраусы)

**СКОТОВО́ДСТВО** *с* малсылыҡ; **занима́ться скотово́дством** малсылыҡ менән шөғөлләнеү

**СКОТОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое малсылыҡ ...ы, мал үрсетеү (аҫрау) ...ы; **скотово́дческое хозя́йство** малсылыҡ хужалығы

**СКОТОЛО́ЖСТВО** *с* мал менән зинасылыҡ

**СКОТОМОГИ́ЛЬНИК** *м* емтек ерләнгән урын, мал зыяраты

**СКОТОПОДО́БНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* хайуандарса ҡыланған, тупаҫ; **скотоподо́бный челове́к** хайуандарса ҡыланған; **скотоподо́бный посту́пок** тупаҫ ҡылыҡ

**СКОТОПРОГО́ННЫЙ,** -ая, -ое мал ҡыуыу ...ы, ҡыуған; **скотопрого́нная доро́га** мал ҡыуған юл

**СКО́ТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** мал ...ы; **ско́тский заго́н** мал ҡураһы **2.** *презр.* (*грубый, подлый*) тупаҫ, хайуандарса ҡыланған, әшәке, ҡәбәхәт; **ско́тское обраще́ние** тупаҫ мөғәмәлә

**СКО́ТСТВО** *с*; *разг.* хайуанлыҡ, тупаҫлыҡ, түбәнлек

**СКРА́ДЫВАТЬ** *несов. что* һиҙҙертмәү, белгертмәү, белендермәү, йәшереү, йотоу, баҫырыу; **пла́тье скра́дывает недоста́тки фигу́ры** күлдәк кәүҙәнең кәмселектәрен йәшерә

**СКРА́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* (*становиться незаметным*) һиҙелмәү, һиҙҙермәү, беленмәү, йәшеренеү, баҫырылыу

**СКРА́СИТЬ** *сов. что* матурлай (йәмләй, биҙәй) төшөү, күңелләндереп (күңел күтәреп) ебәреү, еңеләйтә төшөү

**СКРА́СИТЬСЯ** *сов. см.* **скра́шиваться** 1

**СКРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **скра́сить**; **скра́шивать жизнь** тормошто матурлай төшөү

**СКРА́ШИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **скра́шивать**

**СКРЕБКО́ВЫЙ,** -ая, -ое һоҫҡоло; **скребко́вый транспортёр** һоҫҡоло транспортёр

**СКРЕБНИ́ЦА** *ж* ҡырғыс, ат ҡырғысы; **чи́стить скребни́цей** ҡырғыс менән таҙартыу (*атты*)

**СКРЕБО́К** *м* **1.** (*острая лопатка для очистки чего-л.*) ҡырғыс, таҙартҡыс; **скребо́к для сне́га** ҡар таҙартҡыс **2.** (*большой совок*) һоҫҡо(с), һоҙғаҡ

**СКРЕ́ЖЕТ** *м* **1.** (*резкий звук, возникающий при сильном трении*) шығыр-шығыр иткән (килгән) тауыш, шығырлау; **скре́жет колёс** тәгәрмәстәр шығырлауы **2.** (*о зубах*) шығырлау

**СКРЕЖЕТА́ТЬ** *несов.* **1.** (*издавать скрежет*) шығыр-шығыр итеү, шығырлау **2.** *чем* шығырлатыу, шағырлатыу; **скрежета́ть зуба́ми** теш шығырлатыу

**СКРЕ́ПА** *ж* **1.** *спец. см.* **скрепи́ть – скреплять** 1; **2.** *спец.* тоташтыра торған урын (ер) **3.** (*приспособление*) беркеткес, тоташтырғыс, нығытҡыс **4.** *уст.* (*подпись*) ҡултамға, имза

**СКРЕ́ПЕР** *м* скрепер (*ер эштәре машинаһы*)

**СКРЕПИ́ТЬ** *сов. что* **1.** беркетеү, беркетеп (тоташтырып) ҡуйыу; **скрепи́ть брёвна скоба́ми** бүрәнәне атлама менән беркетеп ҡуйыу **2.** *перен.* (*сделать прочным, нерушимым*) нығытыу; **скрепи́ть дру́жбу кля́твой** дуҫлыҡты ант менән нығытыу **3.** (*удостоверить подписью или печатью*) раҫлау, таныҡлау, ҡул ҡуйыу; **скрепи́ть по́дпись печа́тью** имзаны (ҡултамғаны) мисәт менән раҫлау ♦ **скрепя́ се́рдце** теләмәйенсә генә, теләртеләмәҫ кенә, бик теләмәй (көслөк менән) генә

**СКРЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* берегеү, тоташыу; **бру́сья скрепи́лись** бүрәнәләр тоташҡан

**СКРЕ́ПКА** *ж* **1.** *см.* **скре́пить – скрепля́ть** 1; **2.** беркеткес, ҡыҫтырғыс, ҡағыҙ ҡыҫтырғыс **3.** *см.* **скре́па** 3

**СКРЕПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **скрепи́ть – скрепля́ть**; **скрепле́ние досо́к** таҡталарҙы беркетеп ҡуйыу; **скрепле́ние докуме́нта по́дписью** документты ҡултамға менән нығытыу **2.** *см.* **скре́па** 3; **3.** *мн.* **скрепле́ния** (*скреплённые части чего-л.*) нығытып беркетелгән киҫәктәр

**СКРЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **скрепи́ть**

**СКРЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **скрепи́ться** **2.** *страд. от* **скрепля́ть**

**СКРЕСТИ́** *несов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* тырнау **2.** (*чистить, тереть чем-л. жёстким*) ҡырыу, ҡырғыслау, ышҡыу; **скрести́ сковоро́дку песко́м** табаны ҡом менән ышҡыу **3.** *перен.* (*тревожить, мучить – о мысли, чувстве*) тынғы бирмәү, өйкәп тороу; **скрести́ се́рдце** йөрәкте өйкәп тороу ♦ **на душе́ (на се́рдце) ко́шки скребу́т** эс (йөрәк) яныу, үҙәк өҙгөләнеү, күңел тыныс түгел, йөрәк урынында түгел

**СКРЕСТИ́СЬ** *несов.* ҡыштырлатыу, тырнау; **мышь скребётся** сысҡан ҡыштырлата

**СКРЕСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* асамай һалыу (ҡуйыу), ҡаушырыу; **скрести́ть ру́ки на груди́** ҡулдарҙы ҡаушырыу **2.** *с кем-чем* ситтән һеркәләндереү (аталандырыу), ҡушыу, ҡауыштырыу; **скрести́ть анто́новку с ди́кой я́блоней** антоновка менән ҡырағай алманы һеркәләндереү ♦ **скрести́ть взгля́ды (взо́ры)** бер-береңдең күҙенә яман итеп (асыуланып) ҡарап алыу; **скрести́ть шпа́ги** ҡылыска ҡылыс килеү

**СКРЕСТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** асамай (арҡыры-торҡоро) килеү, киҫешеү; **доро́ги скрести́лись** юлдар киҫеште **2.** *перен.* (*столкнуться*) ҡапма-ҡаршы килеү, бәрелешеү; **их интере́сы скрести́лись** уларҙың уй-теләктәре ҡапма-ҡаршы килде **3.** һеркәләнеү, аталаныу, ҡауышыу **4.** *лингв.* (*оказать взаимное влияние друг на друга — о языках, говорах*) тәьҫир (ҡабул) итеү

**СКРЕЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **скрести́ть** 1, **скрести́ться** 1, 2, 4; **скреще́ние языко́в** телдәрҙең бер-береһенә тәьҫире **2.** (*место*) киҫешкән урын, сат; **скреще́ние доро́г** юлдар саты

**СКРЕ́ЩИВАНИЕ** *с см.* **скрещивать**, **скре́щиваться**

**СКРЕ́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **скрести́ть**

**СКРЕ́ЩИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **скрести́ться** **2.** *страд. от* **скре́щивать**

**СКРИВИ́ТЬ** *сов. см.* **криви́ть**

**СКРИВИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **криви́ться**

**СКРИЖА́ЛЬ** *ж*; *книжн.* **1.** скрижаль (*изге яҙма төшөрөлгән таҡта*) **2.** *чего обычно мн.* **скрижа́ли**; *перен.* сәхифә, бит (*мөһим ваҡиғалар, иҫтәлектәр урыны*); **скрижа́ли исто́рии** тарих сәхифәләре

**СКРИП** *м* шағыр-шоғор (ҡыштыр-ҡыштыр) иткән тауыш, шығырлау, шағырлау, ҡыштырлау; **скрип двере́й** ишек шығырлауы; **скрип пера́** перо ҡыштырлауы ♦ **со скри́пом** теләр-теләмәҫ, көскә-көскә генә

**СКРИПА́Ч** *м* и **СКРИПА́ЧКА** *ж* скрипкасы (*скрипкала уйнаусы*)

**СКРИПЕ́НИЕ** *с см.* **скрипе́ть** 1, 2; **скрипе́ние колёс** тәгәрмәстәр шығырлауы

**СКРИПЕ́ТЬ** *несов.* **1.** шығырлау, шағырлау, шағыр-шоғор килеү; **пол скрипи́т** иҙән шығырлай **2.** (*производить скрип чем-л.*) шығырлатыу; **скрипе́ть зуба́ми** теш шығырлатыу **3.** *перен.*, *разг.*, *шутл.* (*жить кое-как, существовать*) көңгөр-ҡаңғыр йәшәү, йән аҫрау

**СКРИПИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** скрипка ...ы; **скрипи́чные стру́ны** скрипка ҡылдары **2.** скрипкала башҡарыла торған, скрипка өсөн яҙылған; **скрипи́чная сюи́та** скрипка өсөн яҙылған сюита ♦ **скрипи́чный ключ** *муз.* скрипка асҡысы (*нота яҙыуында ҡулланыла*)

**СКРИ́ПКА** *ж* скрипка; **игра́ть на скри́пке** скрипка уйнау

**СКРИ́ПНУТЬ** *сов.* шығырлатып (шағырлатып) ҡуйыу

**СКРИПУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** шығырлап торған, шығырлаҡ; **скрипу́чие сапоги́** шығырлап торған итектәр **2.** (*похожий на скрип*) ғыжылдап торған, ғыжылдауыҡ; **скрипу́чий го́лос** ғыжылдап торған тауыш

**СКРОИ́ТЬ** *сов.* *что* киҫеү, бесеү; **скрои́ть пла́тье** күлдәк бесеү

**СКРО́МНИК** *м* баҫалҡы (инсафлы, тыйнаҡ) кеше

**СКРО́МНИЦА** **1.** *ж см.* **скро́мник** **2.** *м* баҫалҡы (инсафлы, тыйнаҡ) кеше

**СКРО́МНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* баҫалҡылыҡ (инсафлыҡ, тыйнаҡлыҡ) күрһәтеү

**СКРО́МНОСТЬ** *ж* **1.** баҫалҡылыҡ, инсафлыҡ, тыйнаҡлыҡ; **скро́мность поведе́ния** ҡылыҡтағы баҫалҡылыҡ **2.** ябайлыҡ; **скро́мность оде́жды** кейемдең ябайлығы

**СКРО́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** баҫалҡы, инсафлы, тыйнаҡ; **скро́мный челове́к** тыйнаҡ кеше **2.** (*простой*) ябай; **скро́мный до́мик** ябай өй **3.** (*умеренный*, *небольшой*) ҙур булмаған, уртаса булған; **скро́мный пода́рок** ҙур булмаған бүләк; **скро́мный за́работок** уртаса эш хаҡы

**СКРУПУЛЁЗНОСТЬ** *ж* теүәллек, ентеклелек; **скрупулёзность ана́лиза** анализдың ентеклелеге

**СКРУПУЛЁЗНЫЙ,** -ая, -ое теүәл, ентекле; **скрупулёзный труд** ентекле хеҙмәт

**СКРУТИ́ТЬ** *сов.* **1**. *что* (*свернуть жгутом, свитком и т.п.*) ишеү, сиратыу; **скрути́ть верёвку** бау ишеү; **скрути́ть ни́тку** еп сиратыу **2.** *кого-что* (*туго связать чем-л.*) ҡайырып (көрмәләп) бәйләп ҡуйыу; **скрути́ть ру́ки** ҡулдарҙы ҡайырып бәйләп ҡуйыу **3.** *кого-что*; *перен.* (*заставить повиноваться*) буйһондороу, ҡулға алыу; **скрути́ть ди́кого коня́** ҡырағай атты буйһондороу **4.** *кого*; *перен.* (*одолеть — о болезни*) бөгөү, ҡаҡшатыу, аяҡтан йығыу; **боле́знь его́ скрути́ла** ауырыу уны аяҡтан йыҡты

**СКРУТИ́ТЬСЯ** *сов.* ишелеү, сиратылыу, сиралыу; **верёвка скрути́лась** бау ишелде

**СКРУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **скрути́ть** 1, 2

**СКРУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **скрути́ться** **2.** *страд. от* **скру́чивать**

**СКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **скрыть**

**СКРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **скры́ться** **2.** (*прятаться*) ҡасып (боҫоп) йәшәү, йәшеренеп тороу; **скрыва́ться от това́рищей** иптәштәрҙән ҡасып йәшәү **3.** *разг.* (*держать в тайне свои чувства, намерения*) йәшереү, сер итеп тотоу **4.** *перен.* (*корениться*) йәшеренеү, йәшеренеп ятыу; **что скрыва́ется за э́тими слова́ми?** был һүҙҙәрҙә нимә йәшеренгән? **5.** *страд. от* **скрыва́ть**

**СКРЫ́ТНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* йәшерен (аҫтыртын) эш йөрөтөү, йәшереп маташыу, сер итеп тотоу; **скры́тничать пе́ред людьми́** кешеләр алдында йәшереп маташыу

**СКРЫ́ТНОСТЬ** *ж* аҫтыртынлыҡ, йәшеренлек, йәшерен (аҫтыртын) эш итеүсәнлек; **скры́тность хара́ктера** холоҡ аҫтыртынлығы

**СКРЫ́ТНЫЙ,** -ая, -ое аҫтыртын, йәшерен, аҫтыртын (йәшерен) эш итеүсән; **скры́тный челове́к** аҫтыртын кеше

**СКРЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **скрыть 2.** *прил.* (*тайный*) йәшерен; **скры́тый смысл сло́ва** һүҙҙең йәшерен мәғәнәһе ♦ **скры́тая ка́мера** йәшерен камера (*киноға, фотоға, телекамераға һиҙҙермәй генә төшөрөү ысулы*)

**СКРЫТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*спрятать, заслонить*) йәшереү, йәшереп ҡуйыу, ҡаплау; **скрыть лицо́ в поду́шках** йөҙҙө мендәргә йәшереү; **ту́чи скры́ли со́лнце** болоттар ҡояшты ҡапланы **2.** *что* (*не дать возможности заметить чувство, состояние*) йәшереү, һиҙҙермәү; **скрыть волне́ние** тулҡынланыуҙы һиҙҙермәү; **скрыть свою́ ра́дость** шатлығын һиҙҙермәү **3.** *что* (*сохранить в тайне*) йәшереү, сер итеп тотоу; **скрыть от подру́г** эхирәттәрҙән йәшереү

**СКРЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*спрятаться*) йәшенеү, йәшеренеү; **скры́ться в лесу́** урманда йәшеренеү **2.** юҡ булыу, юғалыу, күҙҙән юғалыу; **со́лнце скры́лось за горо́й** ҡояш тау артына инеп юғалды **3.** *перен.* (*остаться незамеченным*) йәшеренеп ҡалыу, беленмәй (һиҙелмәй) ҡалыу; **от него́ ничего́ не скро́ется** уға бер нәмә лә беленмәй ҡалмай

**СКРЮ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **скрю́чить**

**СКРЮ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **скрю́читься 2.** *страд. от* **скрю́чивать**

**СКРЮ́ЧИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* бөгөү, кәкрәйтеү, көмрәйтеү, бөгәрләү; **су́дорогой скрю́чило но́ги** көҙән йыйырыу аяҡтарҙы бөгәрләгән

**СКРЮ́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бөкрәйеү, көмрәйеү, бөгәрләнеү

**СКРЯ́ГА** *м* и *ж* үтә һаран кеше, һыҡмыр, ҡарун

**СКРЯ́ЖНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* үтә һаранланыу, ҡарунланыу

**СКРЯ́ЖНИЧЕСТВО** *с*; *разг.* үтә һаранлыҡ, ҡарунлыҡ

**СКУДЕ́ТЬ** *несов.* ярлыланыу, фәҡирләнеү, аҙайыу, кәмеү, аҙая (кәмей) барыу; **запа́сы не́фти скуде́ют** нефть запастары кәмей бара

**СКУ́ДНОСТЬ** и **СКУ́ДОСТЬ** *ж* ярлылыҡ, фәҡирлек, аҙ (етешһеҙ) булыу; **ску́дность во́дных исто́чников** һыу сығанаҡтарының аҙ булыуы

**СКУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*незначительный*) әҙ, етер-етмәҫ булған, аҙая (кәмей) барған; **ску́дные све́дения** әҙ мәғлүмәт **2.** (*бедный, убогий*) ярлы, фәҡир; **ску́дное хозя́йство** ярлы хужалыҡ; **ску́дная приро́да** ярлы тәбиғәт

**СКУДОУ́МИЕ** *с* аҡыл һайлылығы, аҡыл етешмәү

**СКУДОУ́МНЫЙ,** -ая, -ое аҡылға һай, аҡылы етешмәгән; **скудоу́мный челове́к** аҡылға һай кеше

**СКУ́КА** *ж* күңелһеҙлек, эс бошоу, һағыш

**СКУЛА́** *ж* бит һөйәге

**СКУЛА́СТЫЙ,** -ая, -ое яҫы (киң) битле; **скула́стый челове́к** яҫы битле кеше

**СКУЛИ́ТЬ** *несов.* **1.** (*о собаке*) шыңшыу; (*о человеке*) һыңҡылдап илау **2.** *перен., разг.* (*ныть*) зарланыу, илаулау

**СКУ́ЛЬПТОР** *м* скульптор, һынсы

**СКУЛЬПТУ́РА** *ж* скульптура (**1.** *соҡоп, уйып, ҡойоп төрлө һындар яһай торған сәнғәт төрө* **2.** *шул сәнғәттең әҫәрҙәре*)

**СКУЛЬПТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое скульптура ...ы; **скульпту́рный портре́т** скульптура портреты; **скульпту́рная мастерска́я** скульптура оҫтаханаһы

**СКУ́МБРИЕВЫЙ,** -ая, -ое скумбрия ...ы; **ску́мбриевая икра́** скумбрия ыуылдырығы

**СКУ́МБРИЯ** *ж* скумбрия; **жа́реная ску́мбрия** ҡыҙҙырылған скумбрия

**СКУНС** *м* (*зверь и его мех*) скунс, һаҫыҡ бурһыҡ, скунс бурһыҡ; **воротни́к из ску́нса** скунс яға

**СКУ́НСОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** скунс ...ы; **ску́нсовый мех** скунс тиреһе **2.** скунс, скунс тиреһенән эшләнгән; **ску́нсовая шу́ба** скунс тун

**СКУПА́ТЬ** *несов. см.* **скупи́ть**

**СКУПЕРДЯ́Й** *м* и **СКУПЕРДЯЙКА** *ж*; *прост.* үтә һаран кеше, ҡарун

**СКУПЕ́Ц** *м* һаран (ҡомһоҙ) кеше

**СКУПИ́ТЬ** *сов. кого-что* күпләп һатып алыу, һатып алып бөтөрөү

**СКУПИ́ТЬСЯ** *несов. на что, с неопр.* и *без доп.* һаранланыу, ҡарунланыу, һаранлыҡ күрһәтеү; **скупи́ться на расхо́ды** аҡса тотоуҙа һаранлыҡ күрһәтеү ♦ **не скупи́ться на похвалы́** маҡтауға (маҡтау һүҙҙәренә) арымау, күп маҡтау

**СКУ́ПКА** *ж см.* **скупи́ть** – **скупа́ть**; **ску́пка веще́й** әйберҙәр һатып алыу

**СКУПО́Й,** -ая, -ое **1.** һаран, ҡарун; **скупо́й челове́к** һаран кеше **2.** *в знач. сущ.* **скупо́й** *м* и **скупа́я** *ж* һаран, ҡарун **3.** *перен.* (*скудный*) ярлы, бөхил; **скупа́ приро́да Се́вера** Төньяҡ тәбиғәте ярлы **4.** (тәьҫир) һаран, көсө ҙур булмаған, көсһөҙ; **скупо́й свет** һаран яҡтылыҡ **5.** (*умеренный, сдержанный*) йомарт түгел, һаран; **быть скупы́м на слова́** һүҙгә һаран булыу

**СКУ́ПОСТЬ** *ж* һаранлыҡ, ҡарунлыҡ

**СКУ́ПОЧНЫЙ,** -ая, -ое һатып алыу ...ы; **ску́почный магази́н** һатып алыу магазины

**СКУ́ПЩИК** *м* и **СКУ́ПЩИЦА** *ж* алыпһатар

**СКУ́ТЕР** *м* скутер (*тиҙ йөрөшлө моторлы спорт судноһы*)

**СКУФЬЯ́** *ж* скуфья (*монахтарҙың баш кейеме*)

**СКУЧА́ТЬ** *несов.* **1.** эс бошоу, яманһыулау; **за кни́гой не скуча́ют** китап уҡығанда эс бошмай **2.** *о ком-чём, по ком-чём, по кому-чему* һағыныу, юҡһыныу; **скуча́ть по де́тям** балаларҙы һағыныу

**СКУ́ЧЕННОСТЬ** *ж* тығыҙлыҡ; **ску́ченность населе́ния** халыҡтың тығыҙлығы

**СКУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **ску́чить**

**СКУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ску́читься 2.** *страд. от* **ску́чивать**

**СКУ́ЧИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что*; *спец.* өйөү, өйөп ҡуйыу; **ску́чить се́но** бесәнде өйөп ҡуйыу **2.** *кого-что* тығыҙлау, тығыҙлап урынлаштырыу (тултырыу)

**СКУ́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (бер урынға) йыйылыу (өйөлөү, тупланыу, өйкөмләшеү)

**СКУ́ЧНО 1.** *нареч.* күңелһеҙ, яманһыу, эс бошорғос; **ску́чно его́ слу́шать** уны тыңлауы күңелһеҙ **2.** *кому в знач. сказ.*, *безл.* яманһыу, күңелһеҙ, эс боша; **мне ску́чно** эсем боша

**СКУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*унылый*) күңелһеҙ, яманһыу; **он сего́дня ску́чный** ул бөгөн күңелһеҙ **2.** (*неинтересный*) эс бошорғос, ҡыҙыҡ булмаған; **ску́чная кни́га** эс бошорғос китап

**СКУ́ШАТЬ** *сов. что*, *чего* ашап бөтөрөү

**СЛАБЕ́ТЬ** *несов.* **1.** көсһөҙләнеү, хәлһеҙләнеү, ҡаҡшау, насарланыу; **глаза́ слабе́ют** күҙҙәр насарлана; **слабе́ть от гри́ппа** гриптан хәлһеҙләнеү **2.** баҫылыу, баҫыла төшөү, кәмеү; **ве́тер слабе́ет** ел баҫыла төшә

**СЛАБИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *мед.* **1.** эс йомшарта торған; **слаби́тельное лека́рство** эс йомшарта торған дарыу **2.** *в знач. сущ.* **слаби́тельное** *с* эс йомшартҡыс дарыу; **пить слаби́тельное** эс йомшартҡыс дарыу эсеү

**СЛА́БИТЬ** *несов.* **1.** *кого безл.* эс китеү (йомшарыу); **больно́го сла́бит** ауырыуҙың эсе китә **2.** (*послаблять*) эс йомшартыу (китәреү)

**СЛАБО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "көсһөҙ", "хәлһеҙ", "йомшаҡ", "насар", "бушаҡ", "шыйыҡ" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **слабохара́ктерный** йомшаҡ холоҡло

**СЛАБОВО́ЛИЕ** *с* ихтыяр йомшаҡлығы, ихтыярһыҙлыҡ

**СЛАБОВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йомшаҡ ихтыярлы, ихтыярһыҙ; **слабово́льный челове́к** йомшаҡ ихтыярлы кеше

**СЛАБОДУ́ШИЕ** *с* йомшаҡлыҡ, аумаҡайлыҡ; **проявля́ть слабоду́шие** йомшаҡлыҡ күрһәтеү

**СЛАБОДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое йомшаҡ, аумаҡай; **слабоду́шный челове́к** аумаҡай кеше

**СЛАБОНЕ́РВНЫЙ,** -ая, -ое нервылары ҡаҡшаған, ҡаҡшаған нервылы; **быть слабоне́рвным** ҡаҡшаған нервылы булыу

**СЛАБОРА́ЗВИТЫЙ,** -ая, -ое насар үҫешкән, үҫеш яғынан артта ҡалған; **слабора́звитая промы́шленность** насар үҫешкән сәнәғәт

**СЛАБОСИ́ЛИЕ** *с* көсһөҙлөк, хәлһеҙлек

**СЛАБОСИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көсһөҙ, хәлһеҙ; **слабоси́льный стари́к** хәлһеҙ ҡарт **2.** *тех.* ҡеүәте (көсө) түбән; **слабоси́льный мото́р** ҡеүәте түбән мотор

**СЛА́БОСТЬ** *ж* **1.** көсһөҙлөк, насарлыҡ, йомшаҡлыҡ; **сла́бость мышц** мускулдарҙың көсһөҙлөгө; **сла́бость зре́ния** күреүҙең (күҙ) насарлығы; **сла́бость све́та** яҡтылыҡтың көсһөҙлөгө; **сла́бость руково́дства** етәкселектең йомшаҡлығы **2.** (*недостаток, упадок физических сил*) хәлһеҙлек, кәрһеҙлек; **сла́бость в нога́х** аяҡтарҙың кәрһеҙлеге **3.** (*малодушие*) йомшаҡлыҡ, йомшаҡ күңеллелек; **прояви́ть сла́бость** йомшаҡлыҡ күрһәтеү **4.** (*уязвимое место*) етешһеҙлек, етешһеҙ яҡ, кәмселек; **име́ть сла́бость** етешһеҙ яҡ булыу **5.** (*пристрастие*, *склонность*) ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, әүәҫлек, мауығыусанлыҡ; **сла́бость к теа́тру** театрға булған әүәҫлек

**СЛАБОУ́МИЕ** *с* аҡылға зәғифлек, аҡыл зәғифлеге (һайлығы)

**СЛАБОУ́МНЫЙ,** -ая, -ое аҡылға зәғиф (һай); **слабоу́мный челове́к** аҡылға зәғиф кеше

**СЛАБОХАРА́КТЕРНОСТЬ** *ж* йомшаҡ характерлылыҡ (холоҡлолоҡ)

**СЛАБОХАРА́КТЕРНЫЙ,** -ая, -ое йомшаҡ характерлы (холоҡло), ихтыяр көсө булмаған; **слабохара́ктерный челове́к** йомшаҡ холоҡло кеше

**СЛА́БЫЙ,** -ая, -ое **1.** көсһөҙ, көсө булмаған; **сла́бый челове́к** көсһөҙ кеше; **сла́бый го́лос** көсө булмаған тауыш; **сла́бый ток** көсһөҙ ток **2.** (*болезненный*, *нездоровый*) сибек, хәлһеҙ, кәрһеҙ; **сла́бый ребёнок** сибек бала **3.** (*не обладающий сильной властью*, *мощью*) ҡеүәтһеҙ, көсһөҙ; **сла́бое госуда́рство** көсһөҙ дәүләт; **сла́бая а́рмия** көсһөҙ армия **4.** (*малый*, *незначительный*) әҙерәк, әҙ-мәҙ, бәләкәс кенә, беленер-беленмәҫ; **сла́бая наде́жда** әҙ-мәҙ генә өмөт **5.** йомшаҡ (*белем кимәле түбән булған*); **сла́бый учени́к** йомшаҡ уҡыусы; **сла́бый класс** йомшаҡ класс **6.** (*не крепкий*, *не насыщенный*) шыйыҡ, йомшаҡ, көсһөҙ; **сла́бый чай** шыйыҡ сәй; **сла́бый таба́к** йомшаҡ тәмәке **7.** (*незначительный по своему действию*) йомшаҡ, көсһөҙ; **сла́бый свет** көсһөҙ яҡтылыҡ **8.** (*не тугой*) нығытылмаған, бушаҡ ♦ **сла́бое ме́сто** етешһеҙ (йомшаҡ) яҡ; **сла́бый пол** *см.* **пол** II; **сла́бая струна́** бушаҡ ҡыл

**СЛА́ВА** *ж* **1.** маҡтау, дан; **трудова́я сла́ва** хеҙмәт даны **2.** (*известность в качестве кого-л.*) шөһрәт, дан; **сла́ва тала́нтливого учёного** талантлы ғалимдың даны **3.** *разг.* (*молва*, *слухи*) имеш-мимештәр, юҡ-бар һүҙҙәр, дан ♦ **на сла́ву** бик яҡшы (шәп), ғәжәп шәп; **сла́ва бо́гу** *см.* **бог**; **петь сла́ву** дан йырлау (маҡтау)

**СЛАВИ́СТ** *м* славист (*славяноведение белгесе*)

**СЛА́ВИТЬ** *несов. кого-что* **1.** дан йырлау, данлау, маҡтау; **сла́вить по́двиги во́инов** яугирҙар ҡаһарманлығын данлау **2.** *разг.* (*распространять дурные слухи*) яманатын һатыу, ғәйбәт таратыу

**СЛА́ВИТЬСЯ** *несов.* **1.** *чем* маҡталыу, данлыҡлы булыу, шөһрәт ҡаҙаныу, дан алыу (тотоу); **го́род сла́вится сада́ми** ҡала баҡсалары менән дан тота **2.** *страд. от* **сла́вить** 1

**СЛА́ВКА** *ж* һылыуҡас, көйәҙ турғай (*һоро ҡанатлы, ергә оялай торған ҙур булмаған һайрар ҡош*)

**СЛА́ВНО 1.** *нареч.* яҡшы, һәйбәт, яҡшы (һәйбәт) итеп; **сла́вно порабо́тать** яҡшы итеп эшләү **2.** *в знач. сказ.*; *разг.* бик шәп (яҡшы, һәйбәт); **здесь сла́вно** бында бик шәп

**СЛА́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*знаменитый*) данлыҡлы, данлы, шөһрәтле, шанлы, дан (шөһрәт) ҡаҙанған; **сла́вное и́мя** данлыҡлы исем; **сла́вный по́двиг** данлы батырлыҡ **2.** *разг.* шәп, бына тигән, һөйкөмлө, елле, мөләйем; **сла́вный ребёнок** һөйкөмлө бала; **сла́вный па́рень** елле егет

**СЛАВОСЛО́ВИЕ** *с* саманан тыш маҡтау, күккә күтәреп данлау (маҡтау)

**СЛАВОСЛО́ВИТЬ** *несов. кого-что* и *без доп.* күккә күтәреп маҡтау (данлау), мәҙхиә йырлау (уҡыу)

**СЛАВЯ́НЕ** *мн.* славяндар, славян халыҡтары (*һинд-европа телдәренең бер төрөндә һөйләшкән бер төркөм туғандаш халыҡ*) // *ед.* **славяни́н** *м* славян ир-аты; **славя́нка** *ж* славян ҡатын-ҡыҙы

**СЛАВЯНИ́ЗМ** *м* славянизм (**1.** *икенсе бер телгә славян телдәренән алынған һүҙ* **2.** *урыҫ теленә сиркәү-славян телдәренән алынған һүҙ*)

**СЛАВЯНОВЕ́Д** *м* славяновед (*славяндар буйынса белгес*)

**СЛАВЯНОВЕ́ДЕНИЕ** *с* славяноведение (*славян тарихын, әҙәбиәтен, телен өйрәнгән фәндәр*)

**СЛАВЯНОФИ́Л** *м* и **СЛАВЯНОФИ́ЛКА** *ж* славянофил

**СЛАВЯНОФИ́ЛЬСТВО** *с* славянофиллыҡ (*XIX б. уртаһында Рәсәйҙә барлыҡҡа килгән һәм Рәсәйҙең, Көнбайыш Европанан айырмалы рәүештә, үҙ юлы менән үҫешеүен раҫлаған ижтимағи һәм фәлсәфәүи йүнәлеш*)

**СЛАВЯ́НСКИЙ,** -ая, -ое славян ...ы; **славя́нские языки́** славян телдәре

**СЛАГА́ЕМОЕ** *с* **1.** *мат.* ҡушылыусы, ҡушыла торған һан **2.** (*составная часть целого*) ҡушылма

**СЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **сложи́ть** 4, 6, 7

**СЛАГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сложи́ться** 1–3; **2.** *страд. от* **слага́ть**

**СЛАД: сла́ду нет** *с кем-чем* татыулыҡ (берҙәмлек, килешеү) юҡ

**СЛА́ДИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* ипкә (рәткә) һалыу (килтереү), көйләү, рәтләү, рәткә һалыу; **сла́дить де́ло** эште рәткә һалыу **2.** *с кем* (*справиться*) тыйыу, тыңлатыу; **сла́дить с детьми́** балаларҙы тыңлатыу **3.** йәшереү, һиҙҙер(т)мәү, еңеү; **сла́дить со свои́м волне́нием** тулҡынланыуҙы һиҙҙермәү

**СЛА́ДИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ипкә (рәткә, көйгә) һалыныу, рәтләнеү, яйланыу, яйға һалыныу; **де́ло сла́дилось** эш яйға һалынды

**СЛА́ДКИЙ,** -ая, -ое **1.** татлы; **сла́дкий мёд** татлы бал **2.** татлы, шәрбәтле, шәкәрле; **сла́дкий чай** шәрбәтле сәй; **сла́дкий пиро́г** татлы бәлеш **3.** *в знач. сущ.* **сла́дкое** *с* татлы ашамлыҡ, тәмтом; **ку́шать сла́дкое** тәм-том ашау **4.** *перен.* (*приятный*) татлы, тәмле, рәхәт; **сла́дкий сон** татлы йоҡо **5.** *перен.* (*льстивый*) сөсө, күңел болғатҡыс; **сла́дкая речь** сөсө телмәр

**СЛА́ДКО 1.** *нареч.* татлы итеп, тәмләп, тәмле итеп; **сла́дко есть** тәмле итеп ашау **2.** *нареч.*; *перен.* сөсөләнеп, ярамһаҡланып; **он так сла́дко говори́т** ул шундай сөсөләнеп һөйләй **3.** *в знач. сказ.*, *безл.*; *разг.* рәхәт, күңелле; **ему́ не сла́дко** уға рәхәт түгел; **се́рдцу сла́дко** йөрәккә рәхәт

**СЛАДКОЁЖКА** *м* и *ж*; *разг.* тәмлетамаҡ, татлы тамаҡ

**СЛАДКОЗВУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *трад.-поэт.* нәфис (йомшаҡ, ягымлы) тауышлы; **сладкозву́чный леве́ц** нәфис тауышлы йырсы

**СЛАДКОРЕЧИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *книжн.*, *ирон.* сөсө (татлы) телле; **сладкоречи́вый ора́тор** сөсө телле оратор

**СЛА́ДОСТНЫЙ,** -ая, -ое татлы, ләззәтле; **сла́достные мечты́** татлы хыялдар

**СЛАДОСТРА́СТИЕ** *с* **1.** енси дәртлелек **2.** *перен.* (*наслаждение*) оло ҡыуаныс (кинәнес), ләззәт

**СЛАДОСТРА́СТНОСТЬ** *ж см.* **сладостра́стие**

**СЛАДОСТРА́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** енси яҡтан дәртле **2.** оло ҡыуаныс (кинәнес) кисергән

**СЛА́ДОСТЬ** *ж* **1.** татлылыҡ, татлы тәм; **сла́дость мёда** балдың татлылығы **2.** *мн.* **сла́дости** татлы ашамлыҡтар, тәм-том; **восто́чные сла́дости** көнсығыш илдәренең тәм-томдары

**СЛА́ЖЕННОСТЬ** *ж* көйлөлөк, иплелек, яйға (ипкә, көйгә) һалынғанлыҡ; **сла́женность в рабо́те** эштең яйға һалынғанлығы

**СЛА́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое көйлө, ипле, яйға (ипкә, көйгә) һалынған; **сла́женная рабо́та** яйға һалынған эш

**СЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **сла́дить**

**СЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сла́диться** **2.** *страд. от* **сла́живать** 1

**СЛА́ЗИТЬ** *сов.* **1.** (*вверх*) менеп төшөү; (*вниз*) төшөп менеү; **сла́зить на кры́шу** түбәгә менеп төшөү; **сла́зить в по́греб** мөгәрәпкә төшөп менеү **2.** *разг.* кеҫә (сумка) бутау, кеҫәгә (сумкаға) тығылыу

**СЛА́ЛОМ** *м* слалом (*маяҡтар ҡаҙалған бормалы тау юлынан саңғы менән шыуып төшөү*)

**СЛАЛОМИ́СТ** *м* и **СЛАЛОМИ́СТКА** *ж* слаломсы

**СЛА́ЛОМНЫЙ,** -ая, -ое слалом ...ы; **сла́ломная тра́сса** слалом трассаһы; **сла́ломные лы́жи** слалом саңғыһы

**СЛА́МЫВАТЬ** *несов. см.* **сломи́ть**

**СЛА́МЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сломи́ться** **2.** *страд. от* **сла́мывать**

**СЛА́НЕЦ** *м*; *геол.* һәүерташ, сланец; **горю́чие сла́нцы** янар һәүерташтар; **гли́нистый сла́нец** балсыҡлы һәүерташ

**СЛА́НЦЕВЫЙ,** -ая, -ое һәүерташ ...ы, сланец ...ы; **сла́нцевая промы́шленность** һәүерташ сәнәғәте; **сла́нцевые поро́ды** һәүерташ тоҡомдары

**СЛАСТЁНА** *м* и *ж*; *разг.* тәмлетамаҡ, татлы тамаҡ

**СЛАСТИ́ТЬ** *несов. что* татлыландырыу, баллыландырыу, шәкәрләү, татлы (баллы, шәкәрле) итеү; **сласти́ть те́сто** ҡамырҙы шәкәрләү

**СЛАСТОЛЮ́БЕЦ** *м*; *книжн.* енси дәрткә бирелеүсән кеше

**СЛАТЬ** *несов. кого-что* ебәреү, һалыу, күндереү; **слать пи́сьма** хаттар ебәреү; **слать гонца́** сапҡын ебәреү

**СЛАЩА́ВОСТЬ** *ж* сөсө теллелек, сөсөлөк, үтә наҙлылыҡ

**СЛАЩА́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*чрезмерно ласковый, любезный*) сөсө (татлы) телле; **слаща́вая улы́бка** сөсө йылмайыу **2.** (*отличающийся преувеличенной чувствительностью, красивостью*) сөсө, яһалма; **слаща́вый компли́мент** сөсө комплимент

**СЛЕ́ВА** *нареч.* (*где*) һулда, һул яҡта; (*откуда*) һулдан, һул яҡтан; **сле́ва от доро́ги** юлдан һул яҡта

**СЛЕГКА́** *нареч.* еңелсә, аҙ ғына, саҡ ҡына, бер аҙ; **слегка́ уда́рить** еңелсә һуғыу; **меня́ слегка́ зноби́т** бер аҙ өшөтә

**СЛЕД** *м* **1.** эҙ; **след ноги́** аяҡ эҙе; **за́ячий след** ҡуян эҙе **2.** (*признак, результат чего-л.*) билге, билдә, эҙ; **следы́ пожа́ра** янғын эҙҙәре; **следы́ боле́зни** ауырыу билдәһе **3.** *разг.* (*подошва ноги*) аяҡ табаны, табан аҫты ♦ **без следа́ (исче́знуть)** эҙһеҙ юғалыу, ғәйеп булыу; **замести́ следы́** эҙҙе йәшереү, эҙ яҙҙырыу; **идти́ по следа́м**: 1) артынан ҡалмау, эҙенән барыу; 2) юлынан барыу, фекерен, эшен дауам итеү; **(и) след просты́л** һыуға батҡан кеүек юҡ булыу, эҙе-юлы юҡ, эҙе һыуынған, эҙе лә юғалған

**СЛЕДИ́ТЬ I** *несов.* **1.** *за кем-чем* күҙәтеү, күҙәтеп (ҡарап) тороу; **следи́ть за полётом раке́ты** ракетаның осҡанын күҙәтеп тороу **2.** *за чем* күҙәтеү, күҙәтеп барыу; **следи́ть за успе́хами нау́ки и те́хники** фән һәм техниканың уңыштарын күҙәтеп барыу **3.** *за кем-чем* и *с союзом "чтобы"* (*заботиться, опекать*) ҡарау, һаҡлау, хәстәрлек күрһәтеү, күҙ-колаҡ булыу; **следи́ть за детьми́** балаларға күҙ-колаҡ булыу; **следи́ть за свои́м здоро́вьем** һаулығың хаҡында хәстәрлек күреү; **следи́ть за поря́дком** тәртип һаҡлау **4.** *за кем-чем* (*наблюдать с целью разоблачения*) аңдыу, күҙәтеп йөрөү; **следи́ть за проти́вником** дошманды аңдыу **5.** *кого-что*; *охот.* (*выслеживать*) аңдып (һағалап, күҙәтеп) табыу, эҙенә төшөү; **ли́сы следя́т за́йцев** төлкөләр ҡуян эҙенә төшә ♦ **следи́ть за собо́й** үҙ-үҙеңде ҡарау (*үҙеңдең тышҡы ҡиәфәтең йәки сәләмәтлегең хаҡында хәстәрлек күреү*)

**СЛЕДИ́ТЬ II** *несов. чем* и *без доп.*; *разг.* (*оставлять грязные следы*) (бысраҡ) эҙ ҡалдырыу, (тапап) бысратыу; **следи́ть пол гря́зными сапога́ми** бысраҡ итек менән иҙәнде бысратыу

**СЛЕ́ДОВАНИЕ** *с см.* **сле́довать** 1, 4—6

**СЛЕ́ДОВАТЕЛЬ** *м* следователь, тәфтишсе, тикшереүсе (*енәйәт эшен судҡа тиклем тикшереүсе хеҙмәткәр*)

**СЛЕ́ДОВАТЕЛЬНО** *союз присоед.* и *в знач. вводн. сл.* шулай булғас, тимәк, шуға күрә; **сле́довательно, сего́дня пра́здник** тимәк, бөгөн байрам

**СЛЕ́ДОВАТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое следователь ...ы, тәфтишсе ...ы, тәфтишселек ...ы; **сле́довательский тала́нт** тәфтишселек таланты

**СЛЕ́ДОВАТЬ** *несов.* **1.** *за кем-чем* (*идти следом*) эйәреү, эйәреп (эҙенән) барыу, артынан барыу (килеү); **ребёнок сле́дует за ма́терью** бала әсәһе артынан эйәрә **2.** *за чем* артынан (аръяғынан) башланыу (урынлашыу); **за ле́сом сле́дуют па́хотные зе́мли** урман аръяғынан һөрөнтө ерҙәр башлана **3.** *за чем* (*появляться вслед за чем-л.*) аҙағынан (артынан) булыу (килеү); **одно́ собы́тие сле́дует за други́м** бер ваҡиға артынан икенсеһе була тора **4.** (*двигаться, перемещаться*) барыу; **по́езд сле́дует до Москвы́** поезд Мәскәүгә тиклем бара **5.** *кому-чему*; *перен.* эйәреү, оҡшарға тырышыу; **во всём сле́довать учи́телю** һәр нәмәлә уҡытыусыңа оҡшарға тырышыу **6.** *перен.* эйәреү, һүҙен (кәңәшен) тотоу; **сле́довать сове́там врача́** табиптың кәңәшен тотоу **7.** *из чего* (*быть следствием*) килеп сығыу; **отсю́да сле́дует вы́вод** бынан шундай һөҙөмтә килеп сыға **8.** *кому* (*причитаться*) кәрәк, тейеш (булыу), тейешле; **ско́лько с нас сле́дует?** беҙ күпме тейешлебеҙ? **9.** *с неопр. безл.* кәрәк; **сле́дует доводи́ть рабо́ту до конца́** эште аҙағына тиклем еткерергә кәрәк ♦ **как сле́дует** тейешенсә, яҡшы (һәйбәт) итеп

**СЛЕ́ДОМ** *нареч.* артынса, эҙенән үк, артынан уҡ, шунда уҡ; **идти́ сле́дом** артынса барыу

**СЛЕДОПЫ́Т** *м* **1.** (*охотник*) эҙтабар; **охо́тник-следопы́т** һунарсы-эҙтабар **2.** эҙәрмән; **ю́ные следопы́ты** йәш эҙәрмәндәр

**СЛЕ́ДСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое *юр.* тикшереү ...ы; **сле́дственные о́рганы** тикшереү органдары; **сле́дственные докуме́нты** тикшереү документтары

**СЛЕ́ДСТВИЕ I** *с* (*вывод, результат*) һөҙөмтә; **причи́на и сле́дствие** сәбәп һәм һөҙөмтә

**СЛЕ́ДСТВИЕ II** *с юр.* тикшереү, тәфтиш, суд тикшереүе; **вести́ сле́дствие** тикшереү алып барыу; **быть под сле́дствием** суд тикшереүендә булыу

**СЛЕ́ДУЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** тейешле, тейешле булған; **получи́ть сле́дуемые де́ньги** тейешле булған аҡсаны алыу **2.** *в знач. сущ.* **сле́дуемое** *с* тейешле булған, өлөш, тейеш; **отда́ть ка́ждому сле́дуемое** һәр кешегә тейешен биреү

**СЛЕ́ДУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **сле́довать 2.** *прил.* (*ближайший по очереди*) сираттағы, яҡындағы, киләсәк, буласаҡ, киләһе, алдағы, икенсе, башҡа; **сле́дующая остано́вка** килә-

һе туҡталыш; **на сле́дующий день** икенсе көндө **3.** *мест.* былдай, ошондай, түбәндәге; **запи́ска сле́дующего содержа́ния** ошондай йөкмәткеле ҡулхат **4.** *в знач. сущ.* **сле́дующее** *с* бына нәмә; **произошло́ сле́дующее** бына нәмә булды

**СЛЕЖА́ТЬСЯ** *сов.* оҙаҡ ятып баҫылыу (тығыҙланыу, уҡмашыу); **се́но слежа́лось** бесән оҙаҡ ятып баҫылған

**СЛЁЖИВАТЬСЯ** *несов. см.* **слежа́ться**

**СЛЕ́ЖКА** *ж см.* **следи́ть** I 4; **установи́ть сле́жку** күҙәтеү алып барыу

**СЛЕЗА́** *ж* **1.** *мн.* **слёзы** йәш, күҙ йәше; **лить слёзы** йәш түгеү **2.** йәш тамсыһы (бөртөгө); **слеза́ покати́лась по щеке́** йәш бөртөгө яңаҡ буйлап ағып төштө **3.** *мн.* **слёзы** илаш-һыҡташ, илау; **довести́ до слёз** илау хәленә еткереү **4.** *перен.* (*капля сока, влаги и т.д.*) тамсы, тамсы бөртөгө ♦ **глота́ть слёзы** *см.* **глота́ть**; **крокоди́ловы слёзы** *см.* **крокоди́лов**; **проли́ть слезу́** йәш түгеү; **утопа́ть в слеза́х** йәшкә мансылыу; **сквозь слёзы** йәш аралаш (*илай-илай*)

**СЛЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **слезть**

**СЛЕЗИ́ТЬСЯ** *несов.* йәшләнеү, йәшкәҙәү, йәш тулыу; **глаза́ слезя́тся от ды́ма** төтөнгә күҙ йәшкәҙәй

**СЛЕЗЛИ́ВОСТЬ** *ж* илаҡлыҡ

**СЛЕЗЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*склонный к слезам*) илаҡ, илаусан, йәш түгеүсән **2.** (*жалобный — о голосе*) зарлы, ҡайғылы, ҡыҙғаныс; **слезли́вый го́лос** ҡыҙғаныс тауыш **3.** *перен.* (*чрезмерно чувствительный*) нескә (йомшаҡ) күңелле; **слезли́вый челове́к** йомшаҡ күңелле кеше

**СЛЁЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *анат.* йәш ...ы, күҙ йәше ...ы; **слёзные же́лезы** йәш биҙҙәре; **слёзный кана́л** йәш каналы; **слёзный мешо́к** йәш ҡапсығы **2.** *разг.* (*жалобный*) ҡыҙғаныу тойғоһо уятырлыҡ, йәлләтерлек, ялыныслы; **слёзная про́сьба** ялыныслы үтенес

**СЛЕЗООТДЕЛЕ́НИЕ** *с* күҙҙән йәш килеү

**СЛЕЗОТЕЧЕ́НИЕ** *с* йәш ағыу

**СЛЕЗОТОЧИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** йәш килә (аға) торған, йәшле; **слезоточи́вые глаза́** йәшле күҙҙәр **2.** йәш килтерә торған, йәш ағыҙа торған; **слезоточи́вые га́зы** (күҙҙән) йәш ағыҙа торған газдар

**СЛЕЗОТОЧИ́ТЬ** *несов.* йәш ағыу (килеү, ҡойолоу); **глаза́ слезоточа́т** күҙҙән йәш ҡойола

**СЛЕЗТЬ** *сов.* **1.** төшөү; **слезть с де́рева** ағас башынан төшөү **2.** *разг.* (*выйти на какой-л. станции, остановке*) төшөү, сығыу, төшөп ҡалыу; **слезть на пе́рвой остано́вке** беренсе туҡталышта төшөп ҡалыу **3.** *разг.* (*сползти вниз со своего места*) ҡырынайып (ауышып, ҡыйшайып) төшөү; **ша́пка сле́зла на глаза́** бүрек күҙгә ауышып төшкән **4.** *разг.* (*отпасть, сойти*) ҡубыу, ҡубып төшөү, ҡуптарылыу, һыҙырылыу; **ко́жа сле́зла** тире ҡубып төштө; **кра́ска сле́зла** буяу ҡупҡан

**СЛЕПЕ́НЬ** *м* күгәүен; **бы́чий слепе́нь** үгеҙ күгәүене

**СЛЕПЕ́Ц** *м* **1.** *прям., перен.* һуҡыр, һуҡыр кеше **2.** *зоол. см.* **слепы́ш**

**СЛЕПИ́ТЬ I** *несов.* **1.** күҙҙе сағылдырыу (ҡамаштырыу); **со́лнце слепи́т глаза́** ҡояш күҙҙе ҡамаштыра **2.** күҙгә бәреп инеү, күҙҙе астырмау; **пыль слепи́т глаза́** туҙан күҙҙе астырмай

**СЛЕПИ́ТЬ II** *сов. что* әүәләп (һылап) яһау; **слепи́ть ку́клу из гли́ны** балсыҡтан әүәләп ҡурсаҡ яһау

**СЛЕПИ́ТЬ III** *сов. что* **1.** (*склеить*) йәбештереү, йәбештереп ҡуйыу; **слепи́ть листы́ бума́ги** ҡағыҙ биттәрен йәбештереп ҡуйыу **2.** *перен.* (*сделать небрежно*) әтмәләү, әтмәләп ҡуйыу; **слепи́ть избёнку** өй йоратын әтмәләп ҡуйыу

**СЛЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* (*слипнуться*) йәбешеү

**СЛЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **слепи́ть** III

**СЛЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **слепи́ться 2.** *страд. от* **слепля́ть**

**СЛЕ́ПНУТЬ** *несов.* һуҡырайыу, күҙһеҙ ҡалыу

**СЛЕПО́Й,** -ая, -ое **1.** һуҡыр, күҙһеҙ; **слепо́й челове́к** һуҡыр кеше **2.** *в знач. сущ.* **слепо́й** *м* и **слепа́я** *ж* һуҡыр; **а́збука для слепы́х** һуҡырҙар өсөн әлифба **3.** *перен.* (*невежественный*) тома наҙан, һуҡыр; **слепо́й челове́к** тома наҙан кеше **4.** *перен.* саф, эскерһеҙ, ихлас, һуҡыр; **слепа́я любо́вь** һуҡыр мөхәббәт **5.** (*проявляющийся стихийно*) көтөлмәгән, осраҡлы, стихиялы; **слепы́е си́лы приро́ды** тәбиғәттең стихиялы көстәре **6.** (*нечёткий, неотчётливый — о буквах и т.д.*) асыҡ түгел, тоноҡ, бөләңгерт; **слепы́е бу́квы** тоноҡ хәрефтәр **7.** тоҫмаллап башҡарылған; **слепа́я игра́ в ша́хматы** тоҫмаллап шахмат уйнау **8.** (*не имеющий выхода*) сығыр урыны булмаған; **слепа́я пеще́ра** сығыр урыны булмаған мәмерйә **9.** (*без окон*) тәҙрәһе булмаған; **слепа́я стена́** тәҙрәһе булмаған стена ♦ **слепо́й дождь** ҡояшлы ямғыр; **слепа́я кишка́** *анат.* һуҡыр эсәк; **слепа́я ку́рица** *см.* **ку́рица**

**СЛЕ́ПОК** *м* күсермә (*нимәнәндер алынған һын*); **ги́псовый сле́пок** гипс күсермә

**СЛЕПОРОЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое һуҡыр булып тыуған, тыумыштан һуҡыр; **слепорождённый ребёнок** тыумыштан һуҡыр бала

**СЛЕПОТА́** *ж*; *прям., перен.* һуҡырлыҡ, һуҡыр булыу; **полити́ческая слепота́** сәйәси һуҡырлыҡ ♦ **кури́ная слепота́** *см.* **кури́ный**; **сне́жная слепота́** *см.* **сне́жный**

**СЛЕПУ́Н** *м* һуҡыр йылан (*тропик илдәрҙә йәшәүсе селәүсен һымаҡ һуҡыр йылан*)

**СЛЕПЫ́Ш** *м* һуҡыр сысҡан

**СЛЕСА́РНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* слесарлыҡ итеү, слесарь булып эшләү

**СЛЕСА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** слесарь ...ы, слесарлыҡ ...ы; **слеса́рное де́ло** слесарлыҡ (слесарь) һөнәре **2.** *в знач. сущ.* **слеса́рная** *ж* слесарҙар оҫтаханаһы

**СЛЕ́САРСКИЙ,** -ая, -ое слесарь ...ы; **сле́сарский инструме́нт** слесарь ҡоралы

**СЛЕ́САРСТВО** *с* слесарлыҡ (слесарь) һөнәре

**СЛЕ́САРЬ** *м* слесарь; **ремо́нтный сле́сарь** йүнәтеүсе слесарь; **сле́сарь-настро́йщик** көйләүсе слесарь

**СЛЁТ** *м* **1.** *см.* **слете́ться – слета́ться**; **слёт у́ток** өйрәктәрҙең тупланыуы **2.** слёт, йыйылыш, ҡор; **слёт ю́ных натурали́стов** йәш натуралистар слёты

**СЛЕТА́ТЬ I** *сов.* **1.** (осоп) барып килеү; **слета́ть на самолёте в Челя́бинск** Силәбегә самолётта осоп барып килеү **2.** *разг.* (*очень быстро сбегать куда-л. и вернуться*) йүгереп барып килеү; **слета́ть в магази́н** магазинға йүгереп барып килеү

**СЛЕТА́ТЬ II** *несов. см.* **слете́ть**

**СЛЕТА́ТЬСЯ** *несов. см.* **слете́ться**

**СЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (осоп) килеп ҡуныу (төшөү, ултырыу); **скворе́ц слете́л на ве́тку** сыйырсыҡ ботаҡҡа килеп ҡунды **2.** йығылып төшөү, төшөп китеү; **ребёнок слете́л с крова́ти** бала карауаттан йығылып төштө **3.** (*взлетев, покинуть какое-л. место*) осоп китеү; **воробьи́ слете́ли с де́рева** турғайҙар ағастан осоп китте **4.** *перен.* (*быстро исчезнуть*) ҡасыу, юғалыу, юҡ булыу; **сон слете́л с него́** йоҡоһо ҡасты **5.** *перен.* (*сорваться*) абайламай әйтеп ебәреү, (һүҙ) ысҡындырыу

**СЛЕТЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (осоп килеп) йыйылыу; **о́сы слете́лись на мёд** һағыҙаҡтар балға йыйылған **2.** *перен.*, *разг.* (*собраться*) йүгереп килеп тулыу, йыйылышыу, тупланыу

**СЛЕЧЬ** *сов.* (*серьёзно заболеть*) ауырып (ятып) китеү, ауырып китеү

**СЛИВ** *м* **1.** *см.* **слить – слива́ть** 1, 4–6; **слив бензи́на из ба́ков** бактарҙан бензин ҡойоу **2.** (*устройство для стока жидкости*) улаҡ; **проводи́ть слив** улаҡ үткәреү

**СЛИ́ВА** *ж* слива, ҡара емеш

**СЛИВА́НИЕ** *с см.* **слива́ть**

**СЛИВА́ТЬ** *несов. см.* **слить** 1, 2, 4–6

**СЛИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сли́ться 2.** *страд. от* **слива́ть**

**СЛИ́ВКИ** *только мн.* **1.** (һөт) өҫтө, ҡаймаҡ; **снять сли́вки с молока́** һөттөң өҫтөн алыу **2.** *кого-чего*; *перен.* ҡаймаҡ (*иң яҡшы* (*алдынғы*) *өлөшө*)

**СЛИВНО́Й,** -ая, -ое **1.** йыйып бергә ҡушылған, йыйылма; **сливно́е молоко́** йыйып бергә ҡушылған һөт **2.** (*предназначенный для сливания*) түгеү ...ы, түгә торған; **сливна́я я́ма** йыуынты һыу түгә торған соҡор **3.** йыя (ҡабул итә) торған; **сливно́й моло́чный пункт** һөт йыя торған пункт

**СЛИ́ВОВЫЙ,** -ая, -ое слива ...ы, ҡара емеш ...ы; **сли́вовый лист** слива япрағы; **сли́вовое варе́нье** слива ҡайнатмаһы

**СЛИ́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡаймаҡлы, ҡаймаҡтан әҙерләнгән; **сли́вочное моро́женое** ҡаймаҡлы туңдырма ♦ **сли́вочное ма́сло** аҡ май

**СЛИВЯ́НКА** *ж* сливянка (*шарап*)

**СЛИЗА́ТЬ** *сов.* *что* **1.** ялау, ялап ашау, ялап ҡуйыу (таҙартыу); **слиза́ть варе́нье** ҡайнатманы ялап ҡуйыу **2.** *перен.*, *разг.* ялмау, ялмап юҡ итеү (*ут, һыуға ҡарата*); **ого́нь слиза́л дом** янғын өйҙө ялмап юҡ итте

**СЛИ́ЗЕНЬ** *м* лайлалы ҡусҡар (*әкәм-төкәм*)

**СЛИ́ЗИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** лайлалы; **сли́зистое вещество́** лайлалы матдә **2.** *анат.* лайла ...ы; **сли́зистые же́лезы** лайла биҙҙәре **3.** (*скользкий*) лайла менән ҡапланған, лайлалы, тайғаҡ, тайғалаҡ, шыйғаҡ, шыйғалаҡ

**СЛИЗНУ́ТЬ** *сов.* *что* **1.** ялап алыу **2.** *см.* **слиза́ть** 2

**СЛИЗНЯ́К** *м* **1.** *см.* **сли́зень 2.** *разг.*, *презр.* (*о безвольном человеке*) бешмәгән, ебегән, эшкинмәгән, быҙау

**СЛИ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **слиза́ть**

**СЛИЗЬ** *ж* лайла; **покры́ться сли́зью** лайла менән ҡапланыу

**СЛИНЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *разг.* (*полинять*) төҫөн юғалтыу, уңыу; **пла́тье слиня́ло** күлдәк уңған **2.** *см.* **линя́ть** 2

**СЛИПА́ТЬ** *несов.* *что*; *разг.* һылаштырыу, ҡаплау, томалау; **слеза́ слипа́ет глаза́** йәш күҙҙәрҙе томалай

**СЛИПА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡуша һылашыу, йәбешеү; **снежи́нки слипа́ются** ҡар бөртөктәре йәбешә **2.** йомолоу, йомолоп барыу; **глаза́ слипа́ются** күҙҙәр йомола

**СЛИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое бергә ҡушылған, ҡуш, ҡушып, тоташ; **сли́тное написа́ние** ҡушып яҙыу

**СЛИ́ТОК** *м* ҡойолма (*иретеп ҡалыпҡа ҡойолған металл киҫәге*); **сли́ток ста́ли** ҡорос ҡойолмаһы

**СЛИ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡойолма; **сли́точная медь** ҡойолма баҡыр

**СЛИТЬ** *сов.* *что* **1.** (*смешать*) ҡойоп ҡушыу; **слить молоко́ из двух бидо́нов во фля́гу** ике бидондағы һөттө флягаға ҡойоп ҡушыу **2.** *тех.* (*соединить посредством литья*) иретеп ҡушыу; **слить свине́ц с о́ловом** ҡурғаш менән аҡ ҡурғашты иретеп ҡушыу **3.** (*отлить*) иретеп яһау, ҡойоу; **слить ко́локол** ҡыңғырау ҡойоу **4.** *перен.* бергә ҡушыу, берләштереү; **слить кла́ссы** синыфтарҙы берләштереү **5.** һарҡытыу, һөҙөп алыу; **слить сли́вки с молока́** һөттөң өҫтөн һөҙөп алыу **6.** бушатыу, түгеү; **слить гря́зную во́ду** бысраҡ һыуҙы түгеү

**СЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*соединиться*) ҡушылыу, ҡушылып ағыу, ағып ҡушылыу **2.** *перен.* ҡушылыу, берләшеү, ҡушылып берләшеү; **дере́вни слили́сь** ауылдар ҡушылды

**СЛИЧА́ТЬ** *несов. см.* **сличи́ть**

**СЛИЧА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **слича́ть**

**СЛИЧЕ́НИЕ** *с см.* **сличи́ть – слича́ть**

**СЛИЧИ́ТЬ** *сов.* *что* сағыштырыу, сағыштырып ҡарау (сығыу); **сличи́ть ко́пию с по́длинником** күсермәне төп нөсхә менән сағыштырып сығыу

**СЛИ́ШКОМ** *нареч.* бигерәк, саманан (сиктән) тыш, үтә нык, кәрәгенән артыҡ, самаһыҙ, ифрат; **сли́шком до́брого** саманан тыш ҡиммәт; **сли́шком подро́бно** үтә нык ентекле

**СЛИЯ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **слить** 4 — **сли́ться 2.** (*место*) ҡушылған урын (ер), тамаҡ; **слия́ние двух рек** ике йылғаның ҡушылған урыны

**СЛОБОДА́** *ж* **1.** *ист.* слобода; **монасты́рская слобода́** монастырь слободаһы **2.** *уст.* (*пригород*) биҫтә (*ҡала сите*)

**СЛОБОДСКО́Й,** -ая, -ое *уст.* биҫтә ...ы; **слободско́е населе́ние** биҫтә халҡы

**СЛОВА́КИ** *мн.* словактар, словак халҡы (*Словакияның төп халҡы*) // *ед.* **слова́к** *м* словак ир-аты; **слова́чка** *ж* словак ҡатын-ҡыҙы

**СЛОВА́РНИК** *м*; *разг.* һүҙлексе, һүҙлектәр төҙөүсе

**СЛОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое һүҙлек ...ы; **слова́рный запа́с башки́рского языка́** башҡорт теленең һүҙлек байлығы; **слова́рная рабо́та** һүҙлек эше

**СЛОВА́РЬ** *м* **1.** һүҙлек; **толко́вый слова́рь башки́рского языка́** башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге; **терминологи́ческий слова́рь** терминология һүҙлеге **2.** (*лексика*) һүҙ байлығы; **поэти́ческий слова́рь М.Кари́ма** М.Кәрим поэзияһының һүҙ байлығы

**СЛОВА́ЦКИЙ,** -ая, -ое словак ...ы, Словакия ...ы; **слова́цкий язы́к** словак теле

**СЛОВЕ́СНИК** *м* тел (әҙәбиәт) уҡытыусыһы, телсе, әҙәбиәтсе

**СЛОВЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое һүҙ ...ы, телдән әйтелгән (белдерелгән); **слове́сное предупрежде́ние** телдән әйтелгән иҫкәртеү

**СЛО́ВНИК** *м* һүҙҙәр исемлеге; **сло́вник толко́вого словаря́** аңлатмалы һүҙлек өсөн һүҙҙәр исемлеге

**СЛО́ВНО** *союз сравн.* (*употребляется в сравнительных оборотах и сравнительных придаточных предложениях в значении "как"*) кеүек, һымаҡ, гүйә, шикелле; **поёт сло́вно солове́й** һандуғас кеүек йырлай

**СЛО́ВО** *с* **1.** һүҙ; **значе́ние сло́ва** һүҙҙең мәғәнәһе; **происхожде́ние слов** һүҙҙәрҙең килеп сығышы; **заи́мствованные слова́** үҙләштерелгән һүҙҙәр **2.** (*речь*) тел, телмәр, һөйләү; **культу́ра сло́ва** телмәр мәҙәниәте; **дар сло́ва** һөйләү һәләте **3.** (*обещание*) биргән һүҙ, вәғәҙә; **взять своё сло́во наза́д** вәғәҙәңде кире алыу **4.** фекер, һүҙ; **сказа́ть своё ве́ское сло́во** үҙеңдең төплө фекереңде әйтеү **5.** сығыш, һүҙ; **заключи́тельное сло́во докла́дчика** докладсының йомғаҡлау һүҙе; **вступи́тельное сло́во** инеш һүҙ **6.** *мн.* **слова́** (*текст песни*) (йырҙың) һүҙҙәре (тексы) ♦ **без да́льних (ли́шних) слов** һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙмайынса, оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы; **ве́рить на́ слово** *см.* **ве́рить**; **глота́ть слова́** *см.* **глота́ть**; **други́ми слова́ми** *см.* **друго́й**; **к сло́ву (сказа́ть)** *в знач. вводн. сл.* әйткәндәй, әйтмәксе, һүҙ уңында әйткәндә; **на слова́х**: 1) (*устно*) телдән; 2) (*только в разговоре*) һүҙҙә генә; **не находи́ть слов** *для чего* һүҙ таба алмау, юғалып ҡалыу; **одни́м сло́вом** бер һүҙ менән әйткәндә, ҡыҫҡаһы; **по слова́м** *в знач. вводн. сл.*: 1) әйтеүенсә, әйткәнсә; 2) (*как говорит, учит кто-л.*) әйтеүе (өйрәтеүе, яҙыуы) буйынса; **свои́ми слова́ми (рассказа́ть)** *см.* **свой**; **сло́во в сло́во** бәйнә-бәйнә, һүҙмә-һүҙ; **сло́во за́ слово** һүҙ артынан һүҙ, һүҙ эйәрә һүҙ; **сло́вом не обмо́лвиться** бер һүҙ ҙә әйтмәү, бер һүҙ ҙә өндәшмәү; **слов нет** *в знач. вводн. сл.* һүҙ ҙә юҡ, әлбиттә, ысынлап та; **с пе́рвого сло́ва** шунда уҡ; **с чужи́х слов** кеше аша ғына ишетеп, кеше һүҙенә нигеҙләнеп; **крыла́тые слова́** *см.* **крыла́тый**; **но́вое сло́во** яңы фекер

**СЛОВОИЗМЕНЕ́НИЕ** *с*; *лингв.* һүҙ үҙгәреше

**СЛО́ВОМ** *вводн. сл.* бер һүҙ менән әйткәндә, ҡыҫҡаһы; **словом, мы должны́ за́втра вы́ехать** ҡыҫҡаһы, беҙ иртәгә китергә тейешбеҙ

**СЛОВООБРАЗОВА́НИЕ** *с*; *лингв.* һүҙ яһалышы, һүҙьяһалыш

**СЛОВООБРАЗОВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* һүҙ яһаусы; **словообразова́тельный а́ффикс** һүҙ яһаусы аффикс

**СЛОВООХО́ТЛИВОСТЬ** *ж* һүҙгә (һөйләшергә) әүәҫлек, һүҙсәнлек, һүҙгә йомартлыҡ

**СЛОВООХО́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое һүҙсән, һөйләшергә (һүҙгә) әүәҫ, һүҙгә йомарт; **словоохо́тливый челове́к** һөйләшергә әүәҫ кеше

**СЛОВОПРОИЗВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* һүҙ яһаусы

**СЛОВОПРОИЗВО́ДСТВО** *с*; *лингв.* һүҙ яһалышы

**СЛОВОСОЧЕТА́НИЕ** *с*; *лингв.* һүҙбәйләнеш

**СЛОВОТВО́РЧЕСТВО** *с* яңы һүҙҙәр яһау

**СЛОВОУПОТРЕБЛЕ́НИЕ** *с* һүҙҙең ҡулланылышы, һүҙ ҡулланылышы, һүҙҙәрҙе ҡулланыу

**СЛОВЦО́** *с*; *разг.* һүҙ ♦ **для кра́сного словца́** үткер (йор) һүҙ булһын тип

**СЛОГ** *м* ижек; **закры́тый слог** ябыҡ ижек; **откры́тый слог** асыҡ ижек; **дели́ть сло́во на сло́ги** һүҙҙе ижектәргә бүлеү; **чита́ть по слога́м** ижекләп уҡыу

**СЛОГОВО́Й,** -ая, -ое **1.** *лингв.* ижек ...ы; **слоговы́е зна́ки** ижек билдәләре **2.** *см.* **слогообразу́ющий** ♦ **слогово́е письмо́** ижек яҙыуы

**СЛОГООБРАЗУ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее *лингв.* ижек яһаусы (яһай торған); **слогообразу́ющие зву́ки** ижек яһаусы өндәр

**СЛОЁНЫЙ,** -ая, -ое ҡатлаулы; **слоёное те́сто** ҡатлаулы ҡамыр; **слоёный пиро́г** ҡатлаулы ҡамырҙан бәлеш

**СЛОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сложи́ть** 2, 4, 7; **сложе́ние чи́сел** һандарҙы ҡушыу; **сложе́ние полномо́чий** үҙенән вәкиллек хоҡуғын һалыу **2.** *мат.* ҡушыу, ҡушыу ғәмәле **3.** (*телосложение*) һын, буй-һын; **челове́к кре́пкого сложе́ния** буй-һынға (кәүҙәгә) таҙа кеше

**СЛОЖИ́ТЬ** *сов. что* **1.** өйөп (һалып, тултырып, теҙеп) ҡуйыу; **сложи́ть дрова́ в сара́й** утынды һарайға өйөп ҡуйыу; **сложи́ть кни́ги в шкаф** китаптарҙы шкафҡа теҙеп ҡуйыу **2.** *мат.* ҡушыу; **сложи́ть два и пять** икегә биште ҡушыу **3.** (*построить*) һалыу, сығарыу; **сложи́ть печь** мейес сығарыу (һалыу) **4.** (*сочинить*) ижад итеү, сығарыу; **сложи́ть пе́сню** йыр сығарыу **5.** (*перегнув, придать какой-л. вид, форму*) бөгөп кирегә ҡайтарыу, бөкләү, таҫлау, таҫлап һалыу; **сложи́ть газе́ту попола́м** гәзитте урталай бөкләү; **сиде́ть, сложи́в но́ги** аяҡты бөкләп ултырыу **6.** *разг.* (*сняв, опустить вниз*) өҫтән аҫҡа ҡуйыу, төшөрөү; **сложи́ть но́шу с плеч** йөктө яурындан төшөрөү **7.** *перен.* алыу, алып ташлау, төшөрөү, һалыу; **сложи́ть с себя́ отве́тственность** үҙеңдән яуаплылыҡты алып ташлау ♦ **сложи́ть го́лову** *см.* **голова́**; **сложи́ть ору́жие** ҡорал ташлау, бирелеү; **сложа́ ру́ки сиде́ть** ҡул ҡаушырып тик ултырыу, эшләмәү, ҡыл да ҡыбырлатмау

**СЛОЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*организоваться, создаться*) төҙөлөү, ойошоу; **сложи́лся небольшо́й коллекти́в** ҙур булмаған коллектив төҙөлдө **2.** (*создаться*) барлыҡҡа килеү, тыуыу, килеп тыуыу (сығыу), урынлашыу; **сложи́лась пе́сня** йыр барлыҡҡа килде; **сложи́лась благоприя́тная обстано́вка** ыңғай шарт килеп тыуҙы **3.** (*сформироваться*) өлгөрөү, өлгөрөп (үҫеп, нығып) етеү, етлегеү, формалашыу; **у него́ ещё не сложи́лся хара́ктер** уның холҡо әле нығып етмәгән **4.** *разг.* (*уложить вещи для отъезда*) юлға әҙерләнеү, йыйыныу **5.** *разг.* (*устроить складчину*) аҡса һалышыу; **сложи́ться на сва́дьбу** туйға аҡса һалышыу

**СЛОЖНОПОДЧИНЁННЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* эйәртеүле ҡушма; **сложноподчинённое предложе́ние** эйәртеүле ҡушма һөйләм

**СЛОЖНОСОКРАЩЁННЫЙ: сложносокращённые слова́** *лингв.* ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр

**СЛОЖНОСОЧИНЁННЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* теҙмә ҡушма; **сложносочинённое предложе́ние** теҙмә ҡушма һөйләм

**СЛО́ЖНОСТЬ** *ж* **1.** ҡатмарлы хәл, ҡатмарлылыҡ; **сло́жность хара́ктера** холоҡтоң ҡатмарлылығы; **сло́жность зада́чи** мәсьәләнең ҡатмарлылығы **2.** *мн.* **сло́жности** ҡыйынлыҡтар, ауырлыҡтар; **преодолева́ть сло́жности** ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу ♦ **в о́бщей сло́жности** тулайым алғанда, барыһы, йәмғеһе

**СЛОЖНОЦВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое *бот.* **1.** ҡатмарлы сәскәле **2.** *в знач. сущ.* **сложноцве́тные** *мн.* ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһе

**СЛО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡушма (*бер нисә өлөштән торған*); **сло́жное предложе́ние** ҡушма һөйләм; **сло́жное число́** ҡушма һан **2.** (*многообразный*) ҡатмарлы, күп яҡлы; **сло́жный хара́ктер** ҡатмарлы холоҡ **3.** (*трудный*) ауыр, ҡыйын, ҡатмарлы, буталсыҡ; **сло́жная жизнь** буталсыҡ тормош; **сло́жная опера́ция** ауыр операция **4.** (*причудливый, замысловатый*) хикмәтле; **сло́жный орна́мент** хикмәтле биҙәк

**...СЛО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ижекле" мәғәнәһен аңлатҡан икенсе өлөшө, мәҫ.,* **трёхсло́жный** өс ижекле; **односло́жный** бер ижекле

**СЛОИ́СТОСТЬ** *ж* ҡатлаулылыҡ, ҡатламлылыҡ, ҡатлы-ҡатлы (ҡатлаулы-ҡатлаулы) булыу; **слои́стость го́рных поро́д** тау тоҡомдарының ҡатлы-ҡатлы булыуы

**СЛОИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ҡатлаулы, ҡатламлы, ҡатлы-ҡатлы (ҡат-ҡат) булған; **слои́стые облака́** ҡатлы-ҡатлы болоттар; **слои́стые минера́лы** ҡатлаулы минералдар

**СЛОИ́ТЬ** *несов. что* ҡатлау, ҡатлы-ҡатлы итеү; **слои́ть те́сто** ҡамырҙы ҡатлы-ҡатлы итеү

**СЛОИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡатлауланыу, ҡатлы-ҡатлы булып тороу, ҡатламдарға бүленеү; **слюда́ хорошо́ слои́тся** слюда ҡатламдарға һәйбәт бүленә **2.** *страд. от* **слои́ть**

**СЛОЙ** *м* **1.** ҡатлам, ҡатлау, ҡат; **ве́рхний слой земли́** тупраҡтың өҫкө ҡаты; **слой атмосфе́ры** атмосфера ҡатламы; **слой жи́ра** май ҡатламы **2.** ҡатлам; **широ́кие слои́ населе́ния** халыҡтың киң ҡатламдары

**СЛО́ЙКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **слои́ть 2.** ҡатлама (*ҡатлы-ҡатлы итеп бешерелгән күмәс*)

**...СЛО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡатлы", "ҡатламлы" мәғәнәләрен аңлата торған икенсе өлөшө, мәҫ.,* **многосло́йный** күп ҡатламлы; **двухсло́йный** ике ҡатлы

**СЛОМ** *м* **1.** *см.* **слома́ть – слома́ться**; **дом на слом** һүтелергә тейеш йорт **2.** (*место*) һынған урын

**СЛОМА́ТЬ** *сов. что* **1.** *см.* **лома́ть**; **слома́ть ста́рый дом** иҫке йортто емереү; **слома́ть но́гу** аяҡ һындырыу **2.** *кого-что*; *перен., разг.* (*одолеть, победить*) еңеү, еңеп сығыу, һындырыу; **слома́ть сопротивле́ние проти́вника** дошман ҡаршылығын еңеп сығыу ♦ **слома́ть го́лову** баш ватыу, оҙаҡ уйлау; **слома́ть (себе́) ше́ю** муйынын һындырыу, һәләк булыу; **язы́к слома́ешь** телеңде һындырырһың (*әйтергә бик ҡыйын булған һүҙҙәргә, әйтемдәргә ҡарата*)

**СЛОМА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *см.* **лома́ться** 1, 2; **игру́шка слома́лась** уйынсыҡ ватылған; **лёд слома́лся** боҙ ватылды; **па́лка слома́лась** таяҡ һынды **2.** *перен.* (*ослабеть физически, нравственно*) көстән яҙыу, бөгөлөп төшөү, бирешеү

**СЛОМИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡайырып (шаҡарып) һындырыу, емереү; **бу́ря сломи́ла де́рево** дауыл ағасты һындырҙы **2.** *кого-что*; *перен.* еңеү, буйһондороу, теҙ сүктереү, юҡҡа сығарыу, һындырыу; **сломи́ть сопротивле́ние врага́** дошман ҡаршылығын юҡҡа сығарыу ♦ **сломя́ го́лову** *разг.* алды-артты ҡарамай, йән көс менән, йән

фарман; **(сам) чёрт но́гу сло́мит** шайтан аяғын һындырыр (*тәртипһеҙлеккә, болаға ҡарата*)

**СЛОМИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*переломиться от тяжести*) һыныу, һынып төшөү; **я́блоня сломи́лась** алмағас һынып төшкән **2.** *перен.* (*резко измениться*) һыныу, киҫкен үҙгәреү **3.** (*ослабеть физически, нравственно*) һыныу, ҡаҡшау, бирешеү; **душа́ сломи́лась** рух һынды

**СЛОН** *м* **1.** *в разн. знач.* фил; **африка́нский слон** африка филе; **ходи́ть слоно́м** *шахм.* фил менән йөрөү **2.** *разг.* (*о высоком, толстом, неуклюжем человеке*) думбай ♦ **де́лать из му́хи слона́** төймәләйҙе дөйәләй итеү, сүпте сүмәлә итеү; **слона́ не приме́тить** *ирон.* танау төбөндәге бүрәнәне күрмәү; **слон на́ ухо наступи́л** ҡолағына айыу баҫҡан (*көй-моңға һәләте булмаған кешегә ҡарата*)

**СЛОНЁНОК** *м* фил балаһы

**СЛОНИ́ХА** *ж* инә фил

**СЛОНО́ВОСТЬ** *ж* артыҡ йыуанайыу (*күберәк аяҡтар ныҡ йыуанайыуынан ғибәрәт булған склероз ауырыуы*)

**СЛОНО́ВЫЙ,** -ая, -ое фил ...ы; **слоно́вая кость** фил һөйәге; **слоно́вый хо́бот** фил томшоғо ♦ **слоно́вая бума́га** *спец.* фил ҡағыҙы (*ҡытыршы, ҡалын ҡағыҙ*); **слоно́вая боле́знь** *см.* **слоно́вость**

**СЛОНЯ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* эшһеҙ йөрөү, һәптәнләү; **слоня́ться по го́роду** ҡала буйлап һәптәнләү

**СЛУГА́** *м*; *прям.*, *перен.* хеҙмәтсе; **депута́т — слуга́ наро́да** депутат — халыҡ хеҙмәтсеһе ♦ **ваш поко́рный слуга́** һеҙгә хөрмәт менән ҡараусы, һеҙҙе ихтирам итеүсе

**СЛУЖА́КА** *ж*; *разг.* тәжрибәле (тырыш) хеҙмәткәр

**СЛУЖА́НКА** *ж* хеҙмәтсе, аҫрау

**СЛУ́ЖАЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **служи́ть** **2.** *в знач. сущ.* **слу́жащий** *м* и **слу́жащая** *ж* хеҙмәткәр; **слу́жащий министе́рства** министрлыҡ хеҙмәткәре

**СЛУ́ЖБА** *ж* **1.** *см.* **служи́ть** 1–3, 5, 6; **слу́жба в а́рмии** армиялағы хеҙмәт; **срок слу́жбы** хеҙмәт срогы **2.** (*должность, место работы*) хеҙмәт, эш, хеҙмәт (эш) урыны; **повыше́ние по слу́жбе** хеҙмәте буйынса үрләтеү; **поступи́ть на слу́жбу** хеҙмәткә урынлашыу **3.** (*исполнение воинских обязанностей*) хәрби хеҙмәт; **действи́тельная во́инская слу́жба** мәжбүри хәрби хеҙмәт **4.** *чего*, *какая* хеҙмәт; **слу́жба бы́та** көнкүреш хеҙмәте; **слу́жба свя́зи** элемтә хеҙмәте **5.** *церк.* (*богослужение*) ғибәҙәт ♦ **сослужи́ть слу́жбу** *см.* **сослужи́ть**; **не в слу́жбу, а в дру́жбу** дуҫлыҡ хаҡына (*ниҙер башҡарыуҙы үтенгәндә*)

**СЛУЖЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** хеҙмәт ...ы, эш ...ы; **служе́бное вре́мя** эш ваҡыты **2.** (*вспомогательный*) ярҙамсы, икенсе дәрәжәләге ♦ **служе́бные слова́** *лингв.* ярҙамсы һүҙҙәр (*теркәүес, бәйләүес, киҫәксә*)

**СЛУЖЕ́НИЕ** *с*; *высок.* *см.* **служи́ть** 1; **служе́ние своему́ наро́ду** үҙ халҡыңа хеҙмәт итеү

**СЛУЖИ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *ист.* хеҙмәтле, хеҙмәт итеүсе (*XIV—XVII бб. Рәсәйҙә дәүләт хеҙмәте йәки хәрби хеҙмәт үтәүсе вазифалы кешеләр*); **служи́лые лю́ди** хеҙмәтле кешеләр

**СЛУЖИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** *уст.* хеҙмәтсе **2.** (*низший служащий учреждения*) хеҙмәтсе, ҡараусы, йыйыштырыусы; **служи́тель маяка́** маяҡ хеҙмәтсеһе **3.** *чего*; *высок.* хеҙмәт итеүсе, хеҙмәткәр; **служи́тель нау́ки** фән хеҙмәткәре ♦ **служи́тель ку́льта** дин хеҙмәтсеһе, рухани

**СЛУЖИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кому-чему* хеҙмәт итеү; **служи́ть Оте́честву** Ватанға хеҙмәт итеү **2.** *кем-чем* и *без доп.* (*состоять на службе*) эшләү, хеҙмәт итеү; **служи́ть секретарём** сәркәтип булып эшләү **3.** (*быть военным*) хеҙмәт итеү; **служи́ть во фло́те** флотта хеҙмәт итеү **4.** *чем* (*быть, являться*) булыу, булып тороу; **служи́ть приме́ром** үрнәк булып тороу **5.** хеҙмәтен (вазифаһын) үтәй алыу, файҙаланыу, ҡулланылыу; **э́та ко́мната слу́жит библиоте́кой** был бүлмә китапхана итеп файҙаланыла **6.** яраҡлы булыу, эшкә ашыу; **ста́рые ва́ленки ещё слу́жат** иҫке быймалар әле лә эшкә аша **7.** *что* и *без доп.*; *церк.* ғибәҙәт ҡылыу, ғибәҙәт йолаһын башҡарыу **8.** (*стоять на задних лапах — о некоторых животных*) алғы аяҡтарҙы күтәреп төҙ генә ултырыу

**СЛУКА́ВИТЬ** *сов.*; *разг.* хәйләләү, хәйлә ҡороу, алдау

**СЛУПИ́ТЬ** *сов.* *что*; *прост.* һыҙыртыу, һыҙырып алыу, һуйыу, һуйып алыу, һурҙырыу, ҡабығын әрсеү (һыҙыртыу); **слупи́ть шелуху́ с зерна́** ашлыҡ һурҙырыу

**СЛУПИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* ҡубыу, ҡубып төшөү; **кра́ска слупи́лась со стены́** стенаның буяуы ҡубып төшкән

**СЛУХ** *м* **1.** ишетеү, ишетеү һәләте; **у́хо — о́рган слу́ха** ҡолаҡ — ишетеү ағзаһы; **игра́ть по слу́ху** ишеткән буйынса ғына уйнау **2.** (*весть, известие*) хәбәр, хәбәр-хәтер; **о нём нет слу́ха** уның хаҡында хәбәр-хәтер юҡ **3.** *обычно мн.* **слу́хи** имеш-мимеш хәбәр (һүҙ), ғәйбәт; **пусти́ть слух** ғәйбәт таратыу ♦ **ни слу́ху ни ду́ху** *см.* **дух**; **обрати́ться в слух** донъяны онотоп тыңлай башлау

**СЛУХОВО́Й,** -ая, -ое **1.** ишетеү ...ы; **слуховы́е о́рганы** ишетеү ағзалары **2.** тыңлау ...ы; **слухово́й аппара́т** тыңлау аппараты ♦ **слухово́е окно́** ҡыйыҡ тәҙрәһе (*яҡтылыҡ һәм елләтеү өсөн файҙаланыла*)

**СЛУ́ЧАЙ** *м* **1.** осраҡ, хәл, ваҡиға; **стра́нный слу́чай** ғәжәп ваҡиға; **несча́стный слу́чай** бәләҡаза (осрағы); **в большинстве́ слу́чаев** күпселек осраҡтарҙа **2.** (*благоприятное стечение обстоятельств*) хәл, осраҡ, яй, форсат; **удо́бный слу́чай** уңайлы осраҡ; **предста́вился слу́чай** яйы

килде (сыкты) **3.** (*случайность*) көтөлмәгән хәл, осраҡлылыҡ ♦ **во вся́ком слу́чае** *см.* **вся́кий**; **в проти́вном слу́чае** юғиһә, улай була ҡалһа; **в тако́м слу́чае** шулай булғанда; **на слу́чай** була ҡалғанда; **от слу́чая к слу́чаю** ваҡыт-ваҡыт ҡына, һирәк-мирәк кенә; **при слу́чае** яйы сыҡҡанда, кәрәк була ҡалғанда

**СЛУЧА́ЙНО 1.** *нареч.* осраҡлы рәүештә, көтмәгәндә, уйламағанда; **случа́йно встре́тить** көтмәгәндә осратыу **2.** *в знач. вводн. сл.* -мы/-ме икән; **нет ли у вас, случа́йно, это́й кни́ги?** һеҙҙә ошо китап юҡмы икән? ♦ **не случа́йно** юҡҡа ғына түгел, тик-томалға түгел

**СЛУЧА́ЙНОСТЬ** *ж* **1.** осраҡлылыҡ, көтөлмәгәнлек; **случа́йность встре́чи** осрашыуҙың көтөлмәгәнлеге **2.** (*непредвиденное обстоятельство*) осраҡлы хәл (ваҡиға), көтөлмәгән хәл (ваҡиға); **э́то чи́стая случа́йность** был фәҡәт осраҡлы хәл

**СЛУЧА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** осраҡлы, көтөлмәгән, уйламаған; **случа́йная встре́ча** көтөлмәгән осрашыу **2.** (*не постоянный*) осраҡлы, ваҡытлы, даими булмаған; **случа́йный за́работок** осраҡлы эш хаҡы; **случа́йные уро́ки** даими булмаған дәрестәр

**СЛУЧА́ТЬ** *несов. см.* **случи́ть**

**СЛУЧА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **случи́ться** I; **2.** *в 3 л. ед. ч.* **случа́ется**; **случа́лось** *в знач. вводн. сл.* булғылай, булғылап тора

**СЛУЧА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **случи́ться** II; **2.** *страд. от* **случа́ть**

**СЛУЧИ́ТЬ** *сов. кого, с кем* ҡауыштырыу, ҡасырыу, тороҡтороу

**СЛУЧИ́ТЬСЯ I** *сов.* **1.** булыу, килеп сығыу; **случи́лась беда́** бәлә-ҡаза килеп сыҡты; **что случи́лось?** нимә булды?; **случи́лся пожа́р** янғын килеп сыҡты **2.** *с неопр. безл.*; *разг.* тура килеү; **случи́лось ночева́ть в лесу́** урманда ҡунырға тура килде

**СЛУЧИ́ТЬСЯ II** *сов.* (*о животных*) ҡауышыу, ҡасыу, тороғоу

**СЛУ́ЧКА** *ж см.* **случи́ть – случа́ть**, **случи́ться** II – **случа́ться** II

**СЛУЧНО́Й,** -ая, -ое тороғоу ...ы, ҡасыу ...ы, тороҡтороу ...ы; **случно́й пери́од** тороғоу осоро (мәле); **случно́й пункт** тороҡтороу пункты

**СЛУ́ШАНИЕ** *с см.* **слу́шать** 1–3; **слу́шание ле́кций** лекциялар тыңлау; **слу́шание де́ла в суде́** эште судта ҡарау

**СЛУ́ШАТЕЛЬ** *м* и **СЛУ́ШАТЕЛЬНИЦА** *ж* **1.** тыңлаусы; **слу́шатель конце́рта** концерт тыңлаусы **2.** (*учащийся*) уҡыусы, тыңлаусы; **слу́шатель вое́нной акаде́мии** хәрби академия уҡыусыһы

**СЛУ́ШАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* тыңлау; **слу́шать ра́дио** радио тыңлау; **слу́шать му́зыку** музыка тыңлау **2.** *что* тикшереү, ҡарау, тыңлау; **слу́шать де́ло в суде́** эште судта ҡарау; **слу́шать отчёт местко́ма** месткомдың отчётын тыңлау **3.** *что* (*изучать что-л., посещая курс лекций*) белем алыу, өйрәнеү, тыңлау; **слу́шать курс вы́сшей матема́тики** юғары математика курсын тыңлау **4.** *кого-что* (*следовать чьим-л. советам*) әйткәнде тыңлау (иғтибарға алыу), ҡолаҡ һалыу, һүҙен (кәңәшен) тотоу (тыңлау), тыңлау; **слу́шать воспита́теля** тәрбиәсене тыңлау ♦ **слу́шай!** тыңла! (*тыңлатырға бойороҡ*)

**СЛУ́ШАТЬСЯ** *несов.* **1.** *кого-что* һүҙен (кәңәшен) тыңлау (тотоу), тыңлау; **слу́шаться роди́телей** ата-әсә һүҙен тыңлау **2.** *страд. от* **слу́шать** 1–3

**СЛУШО́К** *м*; *разг.*, *неодобр.* имеш-мимеш, юҡ-бар һүҙ, ғәйбәт; **пусти́ть слушо́к** ғәйбәт таратыу

**СЛЫТЬ** *несов. кем-чем*, *за кого-что* дан алыу (тотоу), даны сығыу, танылыу; **слыть люби́телем му́зыки** музыка яратыу менән танылыу

**СЛЫХА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **слы́шать 2.** *в знач. сказ.*, *безл.*; *разг. см.* **слы́шно** 2, 3; **о нём ничего́ не слыха́ть** уның хаҡында бер нәмә лә ишетелмәй

**СЛЫ́ХОМ: слы́хом не слыха́ть** *прост.*: 1) ишеткән (күргән, белгән) нәмә түгел; 2) тауышы-тыны юҡ, аты-юлы юҡ

**СЛЫ́ШАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* ишетеү, ишетеп тороу; **я слы́шу его́ го́лос** мин уның тауышын ишетәм **2.** *что*, *о ком-чём*, *про кого-что* (*обладать сведениями*) хәбәрҙар булыу, ишетеү, ишетеп белеү; **слы́шать о прие́зде арти́ста** артистың килеүе хаҡында ишетеү **3.** *что*; *разг.* (*ощущать*) һиҙеү, тойоу; **слы́шать за́пах духо́в** хушбуй еҫен тойоу ♦ **ног (земли́) под собо́й не слы́шать**: 1) (*об очень быстром беге*) аяҡ ергә теймәү; 2) (*об усталости*) хәлдән тайыу, теҙ быуындары ҡалмау, ҡалтырау; 3) (*о сильном, радостном чувстве*) түбә күккә тейеү, ҡыуаныс эскә һыймау; **и слы́шать не хо́чет** ҡолағына ла элмәй, тыңларға ла теләмәй

**СЛЫ́ШАТЬСЯ** *несов.* **1.** ишетелеү, ишетелеп тороу, яңғырау; **слы́шится му́зыка** музыка ишетелә **2.** *перен.* һиҙелеү; **в его́ го́лосе слы́шится трево́га** тауышында шом һиҙелә

**СЛЫ́ШИМОСТЬ** *ж* **1.** ишетелеш, ишетелеү дәрәжәһе; **хоро́шая слы́шимость радиопереда́ч** радио тапшырыуҙарҙың яҡшы ишетелеше **2.** (*возможность слышать кого-что-л.*) ишетеү мөмкинлеге

**СЛЫ́ШНО 1.** *нареч.* ишетелер-ишетелмәҫ; **шепта́ть чуть слы́шно** ишетелер-ишетелмәҫ шыбырлау **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* ишетелеү; **слы́шно, как му́ха пролети́т** себен осҡаны ишетелә; **мне вас не слы́шно** мин һеҙҙе ишетмәйем **3.** *о ком-чём в знач. сказ.*, *безл.* хәбәр(ҙәр) бар (юҡ); **о нём давно́ ничего́ не слы́шно** уның хаҡында күптән хәбәр юҡ **4.** *в знач. вводн. сл.*; *прост.* (*говорят*) ахыры, күрәһең, шикелле; **у него́, слы́шно, де́ло идёт на лад** уның эше көйләнеп бара, күрәһең

**СЛЫ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ишетелерлек; **е́ле слы́шный го́лос** көскә ишетелерлек тауыш **2.** *в*

*кратк. ф.* еçе килеү; **слы́шен за́пах духо́в** хушбуй еçе килә **3.** *перен.* һиҙелеү; **в его́ го́лосе слы́шно лука́вство** уның тауышында шаянлыҡ һиҙелә

**СЛЮДА́** *ж* слюда (*минерал*)

**СЛЮ́ДИСТЫЙ,** -ая, -ое слюдалы; **слю́дистые сла́нцы** слюдалы һәүерташтар

**СЛЮДЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** слюдалы; **слюдяно́й сла́нец** слюдалы һәүерташ **2.** слюда, слюда ...ы; **слюдяно́е око́шко** слюда тәҙрә; **слюдяно́й конденса́тор** слюда конденсаторы

**СЛЮНА́** *ж* шайыҡ, һеләгәй, шеләгәй

**СЛЮ́НИ** *мн.*; *разг. см.* **слюна́** ♦ **распусти́ть слю́ни**: 1) (*расплакаться*) балауыҙ һығыу, һытылыу, һеләгәй ағыҙыу; 2) (*проявить безволие*) мәмәйләнеү, йыбытҡыланыу, мәүешләнеү, мәшәүләнеү, булдыҡһыҙланыу

**СЛЮНИ́ТЬ** *несов. что* төкөрөкләү, шыйыҡлау, һеләгәйләү; **слюни́ть па́льцы** бармаҡтарҙы төкөрөкләү

**СЛЮ́НКИ** *мн.*; *ласк. от* **слюна́** ♦ **слю́нки теку́т**: 1) ауыҙ һыуы ҡойолоу (*берәй тәмле ашамлыҡты бик ныҡ ашағы килгәндә әйтелә*); 2) ауыҙ һыуын ҡоротоу (*ҙур ләззәт, кинәнес табып һөйләү*); **глота́ть слю́нки** *см.* **глота́ть**

**СЛЮ́ННЫЙ,** -ая, -ое шайыҡ ...ы, һеләгәй ...ы; **слю́нные же́лезы** шайыҡ биҙҙәре

**СЛЮНООТДЕЛЕ́НИЕ** *с* шайыҡ бүленеп сығыу

**СЛЮНООТДЕЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое шайыҡ бүлеп сығарыу ...ы; **слюноотдели́тельный проце́сс** шайыҡ бүлеп сығарыу процесы

**СЛЮНОТЕЧЕ́НИЕ** *с* шайыҡ (һеләгәй) ағыу

**СЛЮНТЯ́Й** *м* и **СЛЮНТЯ́ЙКА** *ж*; *разг., презр.* ебегән, бешмәгән, мәмәй ауыҙ

**СЛЮНЯ́ВИТЬ** *несов.*; *разг. см.* **слюни́ть**

**СЛЮНЯ́ВЫЙ,** -ая, -ое шайығы (һеләгәйе) ағып торған; **слюня́вый ма́льчик** һеләгәйе ағып торған малай

**СЛЯ́КОТНО** *в знач. сказ., безл. разг.* епшек, еүеш; **на у́лице сля́котно** тышта епшек

**СЛЯ́КОТНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* еүеш, епшек; **сля́котная пого́да** епшек көн

**СЛЯ́КОТЬ** *ж* **1.** (*грязь*) батҡаҡ, бысраҡ; **осе́нняя сля́коть** көҙгө бысраҡ **2.** *разг.* (*сырая погода*) епшек көн

**СЛЯ́ПАТЬ** *сов. что* этмәләү, этмәләп ҡуйыу; **сля́пать скаме́йку** эскәмйә этмәләп ҡуйыу

**СМА́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *чем* майлау, һөртөү, һылау, яғыу; **сма́зать колёса** тәгәрмәстәрҙе майлау; **сма́зать ра́ну йо́дом** йәрәхәткә йод һөртөү **2.** *что* (*стереть, размазать*) һөртөү, һөртөп алыу; **сма́зать кра́ску рукаво́м** буяуҙы ең менән һөртөп алыу **3.** *что*; *перен., разг.* киҫкенлеген (ҡырҡыулығын) кәметеү (йомшартыу); **сма́зать вопро́с** мәсьәләнең киҫкенлеген йомшартыу **4.** *кого*; *прост.* тондороу, ҡундырыу, ултыртыу; **сма́зать по щеке́** яңаҡҡа тондороу

**СМА́ЗАТЬСЯ** *сов.* **1.** һөртөү, һылау, яғыу; **сма́заться кре́мом** крем һөртөү **2.** *разг.* (*размазаться, стереться*) һөртөлөп (буялып) бөтөү **3.** *перен.* йомшартылыу, киҫкенлеге кәмеү

**СМА́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **сма́зать – сма́зывать** 1; **сма́зка колёс** тәгәрмәстәрҙе майлау **2.** май; **сма́зка для мото́ра** мотор майы

**СМАЗЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* һөйкөмлө, күрмәлекле, күркәм, һылыу ғына; **смазли́вая девчо́нка** күркәм ҡыҙыҡай

**СМАЗНО́Й,** -ая, -ое майланған, майлана торған; **смазны́е сапоги́** майланған итек

**СМА́ЗЧИК** *м* и **СМА́ЗЧИЦА** *ж* майлаусы, май һөртөүсе

**СМА́ЗЫВАНИЕ** *с см.* **сма́зывать, сма́зываться**

**СМА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **сма́зать** 1—3

**СМА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сма́заться** **2.** *страд. от* **сма́зывать**

**СМАК** *ж*; *разг.* **1.** (*вкусовое ощущение*) тәм, тат, татлылыҡ; **есть со сма́ком** тәмен татып ашау **2.** *перен.* рәхәтлек тойғоһо, кинәнес, ләззәт; **расска́зывать со сма́ком** *что-л. нимәнелер* ләззәтләнеп (кинәнеп) һөйләү **3.** *перен.* төп мәғәнә, асыл; **поня́ть весь смак расска́за** хикәйәнең төп мәғәнәһен аңлау

**СМАКОВА́ТЬ** *несов. что*; *разг.* **1.** тәмләп (тәмен белеп) ашау (эсеү); **смакова́ть кумы́с** ҡымыҙҙы тәмләп эсеү **2.** *перен.* кинәнеп (ләззәтләнеп) һөйләү (эшләү һ.б.); **смакова́ть но́вость** яңы хәбәрҙе кинәнеп һөйләү

**СМА́ЛЕЦ** *м* иретелгән эс майы, туң май

**СМАЛОДУ́ШЕСТВОВАТЬ** и **СМАЛОДУ́ШНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* бирелеү, ебеү, ҡурҡаҡлыҡ күрһәтеү, ҡаршы тора алмау

**СМА́ЛУ** *нареч.*; *прост.* бәләкәйҙән үк, сабый саҡтан уҡ

**СМАНЕВРИ́РОВАТЬ** *сов.* **1.** манёвр яһау, манёврлау **2.** *перен., разг.* (*схитрить*) хәйлә ҡороу, хәйләләү

**СМА́НИВАТЬ** *несов. см.* **смани́ть**

**СМАНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** ҡыҙыҡтырып (әүрәтеп) саҡырыу **2.** тартыу, ауҙарыу, күсереү; **смани́ть дру́га в свой коллекти́в** дуҫын үҙ коллективына тартыу

**СМАСТЕРИ́ТЬ** *сов. см.* **мастери́ть**

**СМА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **смота́ть**

**СМА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **смота́ться** **2.** *страд. от* **сма́тывать**

**СМА́ХИВАТЬ I** *несов. см.* **смахну́ть**

**СМА́ХИВАТЬ II** *несов. на кого-что*; *разг.* (*быть похожим*) оҡшау, оҡшаш булыу, хәтерләтеү

**СМАХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*удалить с поверхности чего-л. или уронить*) һыпырып (ҡағып, төртөп, этеп) төшөрөү; **смахну́ть пыль со стола́** өҫтәлдәге туҙанды һыпырып төшөрөү **2.** *кого-что* (*отогнать взмахом руки*) ҡыуып ебәреү; **смахну́ть му́ху** себенде ҡыуып ебәреү

**СМА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **смочи́ть**

**СМА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*аппетитный, вкусный*) тәмле, татлы; **сма́чный кусо́к** тәмле киҫәк; **сма́чная пи́ща** татлы аҙыҡ **2.** *перен.* (*выразительный*) тоҙло-боросло, елле, әсе; **сма́чное сло́во** тоҙло-боросло һүҙ

**СМЕЖА́ТЬ** *несов. см.* **смежи́ть**

**СМЕЖА́ТЬСЯ** *несов. см.* **смежи́ться**

**СМЕЖИ́ТЬ** *сов. что* ҡымтып ябыу, йомоу; **смежи́ть глаза́** күҙҙе йомоу

**СМЕЖИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡымтып ябылыу, йомолоу (*күҙгә, күҙ ҡабағына һ.б. ҡарата*)

**СМЕ́ЖНОСТЬ** *ж* эргәләш (сиктәш) булыу, йәнәшәлек, сиктәшлек, яҡынлыҡ; **сме́жность садовы́х уча́стков** баҡсаларҙың эргәләш булыуы; **сме́жность поня́тий** ҡараштарҙың яҡынлығы

**СМЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** эргәләш, сиктәш, йәнәш, күрше; **сме́жные хозя́йства** күрше хужалыҡтар; **сме́жные ко́мнаты** йәнәш бүлмәләр **2.** оҡшаш, яҡын, оҡшаш (яҡын) булған; **сме́жные профе́ссии** оҡшаш профессиялар ♦ **сме́жные углы́** *мат.* эргәләш мөйөштәр

**СМЕКА́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* зирәк, отҡор, осҡор, зиһенле; **смека́листый ма́льчик** зирәк малай

**СМЕКА́ЛКА** *ж*; *разг.* зирәклек, осҡорлоҡ, отҡорлоҡ; **вое́нная смека́лка** хәрби отҡорлоҡ

**СМЕКА́ТЬ** *несов. что, в чём* и *без доп.*; *разг.* төшөнөү, абайлау, аңлап алыу; **смека́ть в де́ле** эште аңлап алыу

**СМЕКНУ́ТЬ** *сов. см.* **смека́ть**

**СМЕЛЕ́ТЬ** *несов.* батырланыу, батырайыу, батырая төшөү, ҡыйыуланыу, ҡыйыулана төшөү

**СМЕ́ЛО** *нареч.* **1.** ҡыйыу, ҡыйыу (тәүәккәл) рәүештә, ҡыйыулыҡ менән; **сме́ло говори́ть о недоста́тках** етешһеҙлектәр хаҡында ҡыйыу һөйләү **2.** *разг.* (*с полным основанием*) икеләнмәйенсә, шикләнмәйенсә; **сме́ло мо́жно согласи́ться** икеләнмәйенсә ризалашып була

**СМЕ́ЛОСТЬ** *ж* ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, тәүәккәллек; **сме́лость солда́та** һалдаттың ҡыйыулығы ♦ **брать (взять) на себя́ сме́лость** тәүәккәлләү

**СМЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыйыу, батыр, ҡурҡыу белмәгән; **сме́лый во́ин** батыр яугир; **сме́лый ма́льчик** ҡурҡыу белмәгән малай **2.** (*решительный, актуальный*) ҡыйыу, тәүәккәл, үткер; **сме́лая мысль** ҡыйыу фекер **3.** *перен.* (*вызывающий*) әҙәпһеҙ, тупаҫ, ояттһыҙ; **сме́лые вы́ходки** тупаҫ ҡыланыштар

**СМЕЛЬЧА́К** *м*; *разг.* ҡыйыу (батыр, тәүәккәл) кеше

**СМЕ́НА** *ж* **1.** *см.* **смени́ть – сменя́ть** II, **смени́ться – сменя́ться** II; **сме́на дня и но́чи** көн менән төндөң алмашыныуы **2.** смена; **рабо́тать в дневну́ю сме́ну** көндөҙгө сменала эшләү **3.** *перен.* киләсәк йәш быуын, алмаш; **молодёжь — на́ша сме́на** йәштәр — беҙҙең алмашыбыҙ **4.** (*комплект одежды*) алмашлыҡ кейем; **две сме́ны белья́** ике алмашлыҡ эске кейем ♦ **на сме́ну** алмашҡа, алмаштырырға, алмаштырыу өсөн

**СМЕНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *в разн. знач.* алмаштырыу; **смени́ть бельё** эске кейемде алмаштырыу; **смени́ть фами́лию** фамилияны алмаштырыу

**СМЕНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *в разн. знач.* алмашыныу; **карау́л смени́лся** ҡарауыл алмашынды

**СМЕ́ННОСТЬ** *ж* сменалап эшләү, сменалылыҡ; **установи́ть сме́нность на заво́де** заводта сменалап эшләүҙе индереү

**СМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** смена ...ы; **сме́нный ма́стер** смена мастеры; **сме́нное зада́ние** смена заданиеһы **2.** сменалап эшләгән, сменалы; **сме́нная рабо́та** сменалы эш **3.** алмаштырыла торған; **сме́нное колесо́** алмаштырыла торған тәгәрмәс

**СМЕ́НЩИК** *м* и **СМЕ́НЩИЦА** *ж* алмашсы, алмаштырыусы, алмашҡа килеүсе

**СМЕНЯ́ТЬ I** *сов. кого-что*; *разг.* алмаштырыу ♦ **сменя́ть куку́шку на я́стреба** ыласынды ҡоҙгонға алмаштырыу

**СМЕНЯ́ТЬ II** *несов. см.* **смени́ть**

**СМЕНЯ́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* (*обменяться*) алмашыу, алмаштырыу; **сменя́ться места́ми** урындарҙы алмашыу

**СМЕНЯ́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **смени́ться 2.** *страд. от* **сменя́ть** II

**СМЕРД** *м*; *ист.* смерд (*Боронғо Руста феодаль крәҫтиән*)

**СМЕРДЕ́ТЬ** *несов.* һаҫыҡ еҫ сығарыу, һаҫытыу

**СМЕРЗА́ТЬСЯ** *несов. см.* **смёрзнуться**

**СМЁРЗНУТЬСЯ** *сов.* йәбешеп туңыу (ҡатыу); **ресни́цы смёрзлись** керпектәр йәбешеп туңған

**СМЕ́РИТЬ** и **СМЕ́РЯТЬ** *сов. что* үлсәү, үлсәп алыу (сығыу); **сме́рить температу́ру** температураны үлсәү ♦ **сме́рить взгля́дом** *кого-что* баштан-аяҡ күҙ йүгертеп сығыу

**СМЕ́РИТЬСЯ** и **СМЕ́РЯТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*ростом*) тиңләшеп ҡарау (*буйға ҡарата*); (*силой*) һынашып ҡарау (*көскә ҡарата*)

**СМЕРКА́ТЬ** *несов. см.* **сме́ркнуть**

**СМЕРКА́ТЬСЯ** *несов. см.* **сме́ркнуться**

**СМЕ́РКНУТЬ** *сов.* **1.** ҡараңғыланыу, ҡараңғыланып китеү **2.** *см.* **сме́ркнуться**

**СМЕ́РКНУТЬСЯ** *сов. безл.*; *разг.* эңер (ҡараңғы) төшөү; **ра́но сме́рклось** иртә ҡараңғы төштө

**СМЕРТЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үлтерә торған, үлемесле; **смерте́льная ра́на** үлемесле яра **2.** (*грозящий гибелью*) ҡыйралышҡа (һәләкәткә) килтерә торған, һәләкәтле; **смерте́льная борьба́** һәләкәтле көрәш **3.** (*непримиримый, яростный*) саманан тыш көслө, аяуһыҙ; **смерте́льная не́нависть** аяуһыҙ нәфрәт **4.** *разг.* (*предельный в своём проявлении*) бик ныҡ, бик ҡаты, сиктән тыш, үлә яҙып; **смерте́льная ску́ка** бик ныҡ эс бошоу; **смерте́льная уста́лость** үлә яҙып арыу

**СМЕ́РТНИК** *м* и **СМЕ́РТНИЦА** *ж* үлемдәр (*үлемгә хөкөм ителгән кеше*); **ка́мера сме́ртников** үлемдәрҙәр камераһы

**СМЕ́РТНОСТЬ** *ж* үлем, үлем-китем; **де́тская сме́ртность** балалар үлеме

**СМЕ́РТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үлем ...ы, әжәл ...ы; **сме́ртный час** үлем сәғәте; **сме́ртная казнь** үлем язаһы **2.** *разг.* (*крайне ожесточённый*) үлемесле; **сме́ртный бой** үлемесле көрәш **3.** (*очень сильный, крайний*) бик ныҡ (көслө, ҙур, ҡаты, яман); **ску́ка сме́ртная** бик ныҡ эс бошоу; **сме́ртный грех** бик ҙур гөнаһ

**СМЕРТОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое үлтерә (үлем килтерә) торған, үлемесле; **смертоно́сный яд** үлтерә торған ағыу; **смертоно́сное ору́жие** үлем килтерә торған ҡорал

**СМЕРТЬ** *ж* **1.** үлем, үлеү, әжәл; **физиологи́ческая смерть** *биол.* тәбиғи үлем; **скоропости́жная смерть** ҡапыл үлеү; **спасти́ от сме́рти** үлемдән ҡотҡарыу; **2.** *перен.* (*гибель*) юҡҡа сығыу, юҡ булыу **3.** *в знач. нареч.*; *прост.* (*очень*) бик көслө, бик ныҡ, сикһеҙ, үлеп; **смерть как скуча́ет** бик ныҡ һағына ♦ **до́ сме́рти** бик, үтә ныҡ; **как смерть бле́дный** мәйет кеүек аҡ, ап-аҡ; **быть (лежа́ть) при́ смерти** үлеп барыу, үлем түшәгендә ятыу; **клини́ческая смерть** *см.* **клини́ческий**; **двум смертя́м не быва́ть, одно́й не минова́ть** үлем ике килмәй, бер генә килә; **гражда́нская смерть** *см.* **гражда́нский**

**СМЕРЧ** *м* ел-дауыл, ҡойон; **сне́жный смерч** ҡар ҡойоно

**СМЕРЧЕВО́Й,** -ая, -ое ел-дауыл ...ы, ҡойон ...ы; **смерчевы́е ту́чи** ҡойон болото

**СМЕСИ́ТЕЛЬ** *м*; *спец.* ҡушылдырғыс (*аппарат*)

**СМЕСТИ́** *сов. что* **1.** һепереү, һепереп төшөрөү; **смести́ хле́бные кро́шки со стола́** өҫтәлдән икмәк валсыҡтарын һеперел төшөрөү **2.** (*метя, сгрести в одну кучу*) һеперел өйөү; **смести́ му́сор в у́гол** сүп-сарҙы мөйөшкә һеперел өйөү **3.** *перен.* юҡ итеү, бөтөрөү, һеперел ташлау; **смести́ враго́в** дошмандарҙы һеперел ташлау

**СМЕСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*сдвинуть, переместить*) ҡуҙғатыу, шыуҙырыу, ҡуҙғатып (шыуҙырып) ҡуйыу, күсереү, күсереп ҡуйыу, шылдырыу; **смести́ть то́чку наблюде́ния** күҙәтеү нөктәһен шылдырыу **2.** *кого-что* урынынан төшөрөү (сығарыу, бушатыу) **смести́ть нача́льника це́ха** цех башлығын урынынан төшөрөү

**СМЕСТИ́ТЬСЯ** *сов.* күсеү, ҡуҙғалыу, шыуыу; **у больно́го смести́лись по́чки** ауырыуҙың бөйөрө ҡуҙғалған

**СМЕСЬ** *ж* **1.** ҡатышма; **смесь ра́зных сорто́в ча́я** сәйҙең төрлө сорттары ҡатышмаһы **2.** ҡушымта; **горю́чая смесь** янар май ҡушымтаһы

**СМЕ́ТА** *ж* смета, иҫәпнамә; **сме́та расхо́дов** сығымдар сметаһы; **соста́вить сме́ту** иҫәпнамә төҙөү

**СМЕТА́НА** *ж* ҡаймаҡ; **щи со смета́ной** ҡаймаҡ һалынған кәбеҫтә ашы

**СМЕТА́ТЬ I** *несов. см.* **смести́**

**СМЕТА́ТЬ II** *сов. что* күбәләү, өйөү, һалыу, ҡойоу; **смета́ть стог** кәбән ҡойоу

**СМЕТА́ТЬ III** *сов. что* (*прошить крупными стежками*) типсеү, типсеп тегеү; **смета́ть подо́л** итәкте типсеү

**СМЁТКА I** *ж*; *разг.* (*способность быстро соображать*) зирәклек; **вое́нная смётка** хәрби зирәклек

**СМЁТКА II** *ж см.* **смести́ — смета́ть** I

**СМЁТКА III** *ж*; *спец. см.* **смета́ть** III

**СМЕТЛИ́ВЫЙ** и **СМЕ́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое зирәк; **сметли́вый учени́к** зирәк уҡыусы

**СМЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое смета ...ы, сметала (иҫәпнамәлә) ҡаралған, сметаға (иҫәпнамәгә) индерелгән; **сме́тные расхо́ды** сметала ҡаралған сығымдар

**СМЕТЬ** *несов. с неопр.* батырсылыҡ итеү (ҡылыу), баҙнат итеү, -һы/-һе булыу; **сметь зайти́** инергә баҙнат итеү; **не смей тро́гать** тейәһе булма

**СМЕХ** *м* көлөү, көлкө; **зарази́тельный смех** ылыҡтырғыс көлөү; **залива́ться сме́хом** шарҡылдап көлөү; **де́тский смех** балалар көлөүе ♦ **(и) смех и го́ре**; **(и) смех и грех** көлөрһең дә иларһың да, ҡыҙыҡ та ҡыҙғаныс та; **подня́ть на́ смех** *разг.* көлкөгә (уйынға) алыу; **не до сме́ха (сме́ху)** көлкө түгел, көлкө ҡайғыһы юҡ (*эштең етдилегенә иғтибар итергә өндәгәндә әйтелә*); **ку́рам на́ смех** *см.* **ку́рица**; **ката́ться со́ смеху** *см.* **ката́ться**

**СМЕХОТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое көлкө килтергес, көлдөрә торған, көлкөлө, көлдөргөс; **смехотво́рный слу́чай** көлкөлө хәл

**СМЕ́ШАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* от **смеша́ть 2.** *прил.*; *в разн. знач.* ҡатыш, ҡатнаш, аралаш; **сме́шанный поро́ды** ҡатнаш тоҡомдар; **сме́шанный лес** аралаш урман; **сме́шанная коми́ссия** ҡатнаш комиссия

**СМЕША́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*сделать смесь*) ҡушыу, ҡушып бутау; **творо́г смеша́ть со смета́ной** эремсеккә ҡаймаҡ ҡушып бутау; **ка́шу смеша́ть с ма́слом** бутҡаға май ҡушып бутау **2.** *что* (*привести в беспорядок*) бутау, бутап бөтөү, болартыу; **смеша́ть кни́ги** китаптарҙы бутап бөтөү **3.** (*спутать*) яңылыштырыу, бутау; **смеша́ть фами́лии** фамилияларҙы бутау

**СМЕША́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡушылыу, буталыу; **кра́ски смеша́лись** буяуҙар буталған **2.** (*перемешаться*) ҡушылып (буталып) китеү; **смеша́ться с толпо́й** халыҡҡа ҡушылып китеү **3.** *перен.* (*спутаться*) сыуалыу, буталыу; **мы́сли смеша́лись** уй-фекерҙәр сыуалды **4.** *разг.* (*смутиться*) ҡаушау, аптырау, ҡаушап (аптырап) ҡалыу; **учени́к смеша́лся** уҡыусы ҡаушап ҡалды

**СМЕШЕ́НИЕ** *с см.* **смеша́ть — смеша́ться** 1—3; **смеше́ние поня́тий** төшөнсәләр буталы-

шы; **смеше́ние докуме́нтов** документтарҙың буталыуы

**СМЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **смеша́ть**

**СМЕ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **смеша́ться** 1—3; **2.** *страд. от* **сме́шивать**

**СМЕШИ́НКА** *ж*; *разг.* көлкө; **произнести́ со смеши́нкой** көлкө ҡатыш әйтеү (һөйләү) ♦ **смеши́нка в рот попа́ла** көлкө ҡапсығы йыртылған

**СМЕШИ́ТЬ** *несов. кого-что* көлдөрөү; **смеши́ть ребёнка** баланы көлдөрөү; **смеши́ть шу́тками** мәрәкәләп көлдөрөү

**СМЕШЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** көлөргә әүәҫ, көлөргә яратҡан, көләкәс; **смешли́вый челове́к** көләкәс кеше **2.** көлөп (йылмайып) торған, көләс; **смешли́вые глаза́** көләс күҙҙәр

**СМЕШНО́Й,** -ая, -ое **1.** көлкө килтерерлек, көлкөлө, ҡыҙыҡ, ирмәк, мәрәкә; **смешно́й слу́чай** ҡыҙыҡ ваҡиға; **смешна́я кни́га** көлкөлө китап; **смешно́е зре́лище** ирмәк тамаша; **смешно́е сло́во** мәрәкә һүҙ **2.** аптырарлыҡ, ғәжәп, иҫ киткес, ҡыҙыҡ; **смешно́й челове́к** ҡыҙыҡ кеше **3.** эстәлекһеҙ, буш, мәғәнәһеҙ; **смешны́е тре́бования** мәғәнәһеҙ талаптар

**СМЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **смести́ть**

**СМЕЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **смести́ться** **2.** *страд. от* **смеща́ть**

**СМЕЩЕ́НИЕ** *с см.* **смести́ть — смеща́ть, смести́ться — смеща́ться**; **смеще́ние с до́лжности** вазифанан бушатылыу

**СМЕЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** көлөү; **смея́ться до слёз** илағансы көлөү; **смея́ться безу́держно** тыйыла алмай көлөү **2.** *над кем-чем* (*насмехаться*) мыҫҡыллау, мыҫҡыл итеү, мыҫҡыллап шаяртыу, көлөү; **смея́ться над глу́постью** ахмаҡлыҡтан көлөү **3.** *перен.*, *разг.* (*говорить несерьёзно, шутить*) уйнап (мәрәкәләп) әйтеү, шаяртыу; **не верь ему́, он смеётся** ышанма уға, ул шаярта ♦ **не сме́йся чужо́й беде́, своя́ на гряде́** көлә етер, артынан һөрә етер

**СМИ́ЛОВАТЬСЯ** *сов.* рәхимлек (шәфҡәтлек, миһырбанлыҡ) күрһәтеү

**СМИНА́ТЬ** *несов. см.* **смять** 1, 2, 4

**СМИРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **смири́ть — смиря́ть, смири́ться — смиря́ться** **2.** (*кротость, покорность*) йыуашлыҡ, буйһоноусанлыҡ, баш эйеүсәнлек, баҫалҡылыҡ, баҫымсаҡлыҡ

**СМИРЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* (*скромный*) баҫалҡы, түбәнселекле, йыуаш **2.** күндәм, килешеүсән, буйһоноусан; **смире́нный вид** буйһоноусан ҡиәфәт **3.** (*очень смирный*) тыңлаусан, йыуаш

**СМИРИ́ТЬ** *сов. кого-что* баш эйҙереү, буйһондороу, еңеү; **смири́ть свою́ го́рдость** үҙенең мин-минлеген еңеү; **смири́ть непоко́рных** баш бирмәүселәрҙе буйһондороу

**СМИРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *книжн.*, *уст.* ризалашыу, баҫылыу, буйһоноу, баш эйеү; **смири́ться с судьбо́й** яҙмыш менән ризалашыу **2.** *с чем* күнеү, күнегеү, килешеү, күнегеп китеү; **смири́ться с мы́слью о сме́рти** үлеү тураһындағы фекергә (үлемгә) күнеү **3.** (*успокоиться*) тыныу, тынысланыу

**СМИ́РНЫЙ,** -ая, -ое йыуаш, тыңлаусан, күндәм; **сми́рная ло́шадь** йыуаш ат

**СМИРЯ́ТЬ** *несов. см.* **смири́ть**

**СМИРЯТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **смири́ться** **2.** *страд. от* **смиря́ть**

**СМО́КВА** *ж* инжир

**СМОЛА́** *ж* ыҫмала, сайыр; **сосно́вая смола́** ҡарағай ыҫмалаһы; **синтети́ческая смола́** синтетик ыҫмала

**СМОЛЁВКА** *ж* **1.** *бот.* елем үлән, йәбешкәк үлән **2.** *зоол.* һыбашҡы

**СМОЛЁНЫЙ,** -ая, -ое ыҫмалаланған, сайырланған, ыҫмала (сайыр) һөртөлгән; **смолёная ло́дка** ыҫмалаланған кәмә

**СМОЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ыҫмалаға бай, ыҫмалалы, сайырлы; **смоли́стое де́рево** сайырлы ағас **2.** ыҫмала еҫе аңҡыған, ыҫмала еҫе сыҡҡан (килгән); **смоли́стый во́здух** ыҫмала еҫе аңҡыған һауа

**СМОЛИ́ТЬ** *несов. что* **1.** ыҫмала һөртөү (һеңдереү), ыҫмалалау; **смоли́ть кана́т** арҡанды ыҫмалалау; **смоли́ть ло́дку** кәмәне ыҫмалалау **2.** *прост.* күп тәмәке тартыу (көйрәтеү)

**СМОЛКА́ТЬ** *несов. см.* **смо́лкнуть**

**СМО́ЛКНУТЬ** *сов.* шымыу, тыныу, шым булыу, шымып (тымып, тынып) ҡалыу; **голоса́ смо́лкли** тауыштар тынып ҡалды

**СМОЛОВА́Р** *м см.* **смолоку́р**

**СМОЛОВА́РНЯ** *ж см.* **смолоку́рня**

**СМО́ЛОДУ** *нареч.*; *разг.* **1.** (*с юных лет*) йәштән, йәш саҡтан, йәш ваҡыттан; **он смо́лоду живёт в тайге́** ул йәштән тайгала йәшәй **2.** (*в молодости*) йәш саҡта, йәш ваҡытта; **смо́лоду он мно́го е́здил** йәш саҡта ул бик күп ерҙәрҙә йөрөгән

**СМОЛОКУ́Р** *м* ыҫмала ҡайнатыусы, сайыр ағыҙыусы (кеше)

**СМОЛОКУРЕ́НИЕ** *с* ыҫмала ҡайнатыу (сайыр ағыҙыу) эше

**СМОЛОКУ́РНЯ** *ж* ыҫмала ҡайнатыу урыны

**СМОЛОТИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* һуғыу, һуғып алыу; **смолоти́ть рожь** арыш һуғып алыу

**СМОЛО́ТЬ** *сов. что* **1.** (*о зерне*) тартыу, тарттырыу; (*в ступе*) төйөү, төйҙөртөү; **смоло́ть пшени́цу** бойҙай тартыу; **смоло́ть пе́рец** борос төйөү **2.** *прост.* (*съесть много и быстро*) йыпырып (күп) ашау **3.** *перен.*, *прост.* (*сказать что-л. неуместное*) сәпәп ҡуйыу, (һүҙ) әйтеп ебәреү

**СМОЛЧА́ТЬ** *сов.* яуап ҡайтармау, өндәшмәй (шым) ҡалыу, өндәшмәү; **во́время смолча́ть** үҙ ваҡытында өндәшмәй ҡалыу

**СМОЛЬ: чёрный как смоль** дөм ҡара, ҡап-ҡара, һағыҙ кеүек ҡара

**СМОЛЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** ыҫмала ...ы, сайыр ...ы; **смоляна́я кислота́** ыҫмала кислотаһы

**2.** (*содержащий смолу*) ыҫмалалы, сайырлы; **смоляна́я пи́хта** сайырлы аҡ шыршы **3.** (*смолёный*) ыҫмалаланған; **смоляно́й кана́т** ыҫмалаланған арҡан **4.** (*о цвете*) ҡап-ҡара, дөм ҡара; **смоляны́е во́лосы** дөм ҡара сәс

**СМОНТИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **монти́ровать**; **смонти́ровать агрега́т** агрегатты монтажлау

**СМОРГНУ́ТЬ** *сов. что* (керпек) ҡағыу, (керпек ҡағып) ағыҙыу (төшөрөү); **сморгну́ть слезу́** күҙ йәшен төшөрөү ♦ **не сморгну́в (гла́зом) (сде́лать)** оҙаҡ уйлап тормай (эшләү)

**СМОРИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* **1.** йонсотоу, интектереү, яфалау; **смори́ть го́лодом** аслыҡ менән интектереү **2.** (*одолеть — о сне*) йоҡо баҫыу, ойой башлау, ойотоу

**СМОРКА́ТЬСЯ** *несов.* һемгереү

**СМОРО́ДИНА** *ж* ҡарағат (*ҡыуағы һәм емеше*); **бе́лая сморо́дина** аҡ ҡарағат; **кра́сная сморо́дина** ҡыҙыл ҡарағат; **чёрная сморо́дина** ҡара ҡарағат

**СМОРО́ДИННЫЙ** и **СМОРО́ДИНОВЫЙ,** -ая, -ое ҡарағат ...ы; **сморо́динный куст** ҡарағат ҡыуағы; **сморо́диновое варе́нье** ҡарағат ҡайнатмаһы

**СМОРО́ЗИТЬ** *сов. что*; *прост.* йүнһеҙ һүҙ ысҡындырыу, кәрәкмәгән һүҙ әйтеп ебәреү

**СМОРЧО́К** *м* **1.** *бот.* (*гриб*) бүрекбаш бәшмәк **2.** *прост.* (*о маленьком, невзрачном человеке*) иргәйел, кәрлә, ҡураныс кеше

**СМО́РЩЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **смо́рщить 2.** *прил.* йыйырсыҡ менән ҡапланған, йыйырсыҡлы, сирыш; **смо́рщенное лицо́** йыйырсыҡлы бит **3.** *прил.* ҡурышып (сирышып, бөрөшөп, йомарланып, бөтәрләнеп, ойпаланып) бөткән; **смо́рщенный тулу́п** бөтәрләнеп бөткән толоп

**СМО́РЩИВАТЬ** *несов. см.* **смо́рщить**

**СМО́РЩИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **смо́рщиться 2.** *страд. от* **смо́рщивать**

**СМО́РЩИТЬ** *сов. что* **1.** йыйырыу, йыйырсыҡландырыу, сирыу, сирылтыу; **смо́рщить нос** танау йыйырыу **2.** (*съёжить, покоробить*) ойпалап (йомарлап, бөтәрләнеп) бөтөү; **смо́рщить покрыва́ло** япманы ойпалап бөтөү

**СМО́РЩИТЬСЯ** *сов.* **1.** йыйырылыу, йыйырсыҡланыу; **его́ лоб смо́рщился** маңлайы йыйырсыҡланды **2.** сырай (йөҙ) һытыу; **смо́рщиться от бо́ли** ауыртыуҙан сырай һытыу **3.** (*съёжиться, покоробиться*) ойпаланып (йомарланып) бөтөү; **бума́га смо́рщилась** ҡағыҙ ойпаланып бөткән

**СМОТА́ТЬ** *сов. что* **1.** йомғаҡлау, йомғаҡ итеп урау; **смота́ть ни́тки в клубо́к** епте йомғаҡ итеп урау **2.** (*мотая, снять*) һүтеү, һүтеп урау, урап алыу; **смота́ть нить с кату́шки** кәтүктәге епте урап алыу ♦ **смота́ть у́дочки** *прост.* тайыу, шылыу, табан ялтыратыу, һыпыртыу

**СМОТА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йомғаҡланыу, йомарланыу **2.** *прост.* шылыу, һыпыртыу, тайыу; **смота́ться домо́й** өйгә һыпыртыу

**СМО́ТКА** *ж см.* **смота́ть — сма́тывать**

**СМОТР** *м* смотр, байҡама, ҡарап (байҡап) тикшереү; **смотр войска́м** ғәскәрҙәргә смотр үткәреү; **смотр де́тской худо́жественной самоде́ятельности** балаларҙың үҙешмәкәр сәнғәт смотры

**СМОТРЕ́ТЬ** *несов.* **1.** ҡарау, ҡарап сығыу; **смотре́ть кинофи́льм** кинофильм ҡарау; **смотре́ть в окно́** тәҙрәгә ҡарау; **смотре́ть на не́бо** күккә ҡарау **2.** *за кем-чем* (*наблюдать, заботиться*) күҙәтеү, һаҡлау, ҡарау, күҙ-ҡолаҡ булыу; **смотре́ть за детьми́** балаларға күҙ-ҡолаҡ булыу; **смотре́ть за поря́дком** тәртип һаҡлау **3.** *на кого-что*; *разг.* (*брать пример с кого-л., считаться с кем-л.*) ҡарау, өлгө алыу; **смотре́ть на ста́рших** өлкәндәрҙән үрнәк алыу **4.** *перен.* ҡарау, баһа биреү; **как вы смо́трите на э́то собы́тие?** был ваҡиғаға нисек ҡарайһығыҙ? **5.** *кого-что* (*осматривать*) ҡарау, тикшереү, тикшереп ҡарау; **смотре́ть больно́го ребёнка** ауырыу баланы тикшереп ҡарау **6.** *что* (*знакомиться*) ҡарау, танышыу, ҡарап тикшереү; **смотре́ть тира́жную табли́цу** отош тиражы менән танышыу; **смотре́ть вы́ставку** күргәҙмәне ҡарау **7.** *повел.* **смотри́(те)** ҡара(ғыҙ) әле; **смотри́те, кака́я краси́вая де́вушка** ҡарағыҙ әле, ниндәй сибәр ҡыҙ ♦ **куда́ смо́трит?** ҡайҙа ҡарай икән?, ни эшләп бер ҙә иғтибар итмәй?; **смотре́ть пря́мо (сме́ло) в глаза́** *см.* **глаз**; **смотре́ть во́лком** бүре һымаҡ ҡарау (*ныҡ асыуланғанда*); **смотре́ть молодцо́м** шәп (дәртле, йәш) күренеү; **смотре́ть сквозь па́льцы** бармаҡ аша ҡарау; **смотре́ть други́ми глаза́ми** *см.* **глаз**; **смотре́ть сме́рти в глаза́** *см.* **глаз**; **смотре́ть в лицо́** *см.* **лицо́**; **смотре́ть в ко́рень** *см.* **ко́рень**

**СМОТРЕ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *во что* үҙ-үҙенә ҡарау, ҡараныу; **смотре́ться в зе́ркало** көҙгөгә ҡараныу **2.** ҡаралыу, күренеү; **фильм хорошо́ смо́трится** фильм яҡшы ҡарала; **пла́тье отли́чно смо́трится** күлдәк матур күренә **3.** *см.* **ви́деться** 1; **4.** *страд. от* **смотре́ть** 5, 6

**СМОТРИ́НЫ** *мн.* ҡыҙ ҡарау (күреү) (*урыҫтарҙың буласаҡ килен менән танышыу йолаһы*)

**СМОТРИ́ТЕЛЬ** *м* и **СМОТРИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* күҙәтсе, күҙәтеп (байҡап) тороусы, ҡарауылсы, байҡаусы, ҡараусы; **смотри́тель скла́да** склад ҡараусыһы

**СМОТРИ́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое күҙәтсе ...ы, ҡараусы ...ы; **смотри́тельская до́лжность** күҙәтсе вазифаһы

**СМОТРОВО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡарау ...ы, күҙәтеү ...ы; **смотрово́е стекло́** күҙәтеү быялаһы; **смотрова́я щель в та́нке** танкылағы күҙәтеү еге **2.** смотр ...ы, байҡама ...ы; **смотрова́я коми́ссия** смотр комиссияһы

**СМОЧИ́ТЬ** *сов. что* еүешләү, сылатыу, һыу тейҙереү, һыулау; **смочи́ть во́лосы** сәсте еүешләү; **смочи́ть ва́ту йо́дом** мамыҡты йод менән сылатыу

**СМОЧЬ** *сов. с неопр.* булдыра (килә һ.б.) алыу, ҡулдан (көстән, хәлдән) килеү; **он не смог прийти́** ул килә алманы

**СМОШЕ́ННИЧАТЬ** *сов.* хәйлә менән алдырыу, хәйләләү

**СМРАД** *м* һаҫыҡ (еҫ); **боло́тный смрад** һаҙ һаҫығы

**СМРА́ДНО 1.** *нареч.* һаҫыҡ; **смра́дно па́хнут** һаҫыҡ булыу **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* һаҫыҡ (еҫ); **в ко́мнате смра́дно** бүлмәлә һаҫыҡ

**СМРА́ДНЫЙ,** -ая, -ое һаҫыҡ, һаҫыҡ еҫле; **смра́дный дым** һаҫыҡ төтөн

**СМУГЛЕ́ТЬ** *несов.* ҡуңырайыу, ҡуңырланыу, ҡуңыр төҫкә инеү

**СМУГЛОЛИ́ЦЫЙ,** -ая, -ое ҡуңыр йөҙлө; **смуглоли́цая де́вушка** ҡуңыр йөҙлө ҡыҙыҡай

**СМУ́ГЛОСТЬ** *ж* ҡуңырлыҡ

**СМУ́ГЛЫЙ,** -ая, -ое ҡуңыр; **сму́глое лицо́** ҡуңыр йөҙ

**СМУГЛЯ́НКА** *ж*; *разг.* ҡуңыр йөҙлө ҡатын-ҡыҙ

**СМУДРИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* хикмәт сығарыу (сығарып ҡуйыу), ахмаҡлыҡ эшләп ташлау

**СМУ́ТА** *ж* **1.** *уст.* (*мятеж*) бола, сыуалыш **2.** *разг.* (*раздор*) ғауға, ығы-зығы, талаш-тартыш ♦ **се́ять сму́ту** ҡотҡо таратыу

**СМУТИ́ТЬ** *сов. кого* **1.** (*вызвать смуту*) ғауға ҡуптартыу, болартыу; **смути́ть наро́д** халыҡты болартыу **2.** (*нарушить спокойствие кого-чего-л.*) борсоу, тынғыһыҙлау, тыныслыҡты боҙоу, тынысһыҙландырыу; **смути́ть поко́й** *чей-л. кемдеңдер* тыныслығын боҙоу; **смути́ть ду́шу** күңелде тынғыһыҙлау **3.** (*привести в смущение*) ҡаушатыу, оялтыу, уңайһыҙ хәлгә ҡалдырыу, аптыратыу; **смути́ть ребёнка** баланы оялтыу

**СМУТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *уст.* ҡаушау, оялыу, уңайһыҙланыу; **ребёнок смути́лся** бала ҡаушаны

**СМУ́ТНО 1.** *нареч.* әҙ-мәҙ, һиҙелер-һиҙелмәҫ, тоноҡ ҡына; **сму́тно по́мнить** әҙ-мәҙ генә хәтерләү **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* шомло, борсоулы, тынғыһыҙ, тынысһыҙ; **у меня́ сму́тно на душе́** күңелем тынысһыҙ

**СМУ́ТНОСТЬ** *ж* асыҡ (аныҡ) булмау, тоноҡлоҡ, билдәһеҙлек; **сму́тность жела́ния** теләктең аныҡ булмауы

**СМУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*мятежный*) болалы, сыуалышлы, ғауғалы, ығы-зығылы; **сму́тное вре́мя** болалы ваҡыт **2.** (*тревожный*) тынғыһыҙ, борсоулы, шомло; **сму́тное настрое́ние** борсоулы кәйеф **3.** (*неясный*) асыҡ (аныҡ) булмаған, тоноҡ, бөләңгерт; **сму́тные очерта́ния гор** тауҙарҙың тоноҡ һыҙаттары

**СМУТЬЯ́Н** *м* и **СМУТЬЯ́НКА** *ж*; *разг.* ара боҙоусы, ҡотҡо таратыусы, ҡотҡосо

**СМУ́ШКА** *ж* илтер (*йәш бәрәс тиреһе*)

**СМУ́ШКОВЫЙ,** -ая, -ое илтер (*бәрәс тиреһенән тегелгән*); **сму́шковая ша́пка** илтер бүрек

**СМУЩА́ТЬ** *несов. см.* **смути́ть**

**СМУЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **смути́ться 2.** *страд. от* **смуща́ть**

**СМУЩЕ́НИЕ** *с* **1.** ҡаушау, ҡаушап ҡалыу, оялыу, уңайһыҙлыҡ; **испы́тывать смуще́ние** уңайһыҙлыҡ кисереү **2.** *уст.* (*тревога*) борсолоу, тулҡынланыу **3.** (*мятеж*) бола, күтәрелеш

**СМУЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **смути́ть 2.** *прил.* ҡаушаған, уңайһыҙланған, оялсан, ҡаушап (оялып) ҡалған; **смущённая улы́бка** оялсан йылмайыу

**СМЫВ** *м*; *спец. см.* **смыть — смыва́ть** 2; **смыв по́чвы** тупраҡтың йыуылыуы

**СМЫВА́ТЬ** *несов. см.* **смыть**

**СМЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **смы́ться 2.** *страд. от* **смыва́ть**

**СМЫКА́ТЬ** *несов. см.* **сомкну́ть**

**СМЫКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сомкну́ться 2.** *страд. от* **смыка́ть**

**СМЫСЛ** *м* **1.** мәғәнә, эстәлек, йөкмәтке; **смысл сло́ва** һүҙҙең мәғәнәһе; **поня́ть смысл** эстәлегенә төшөнөү **2.** (*цель, разумное основание*) маҡсат, мәғәнә; **смысл жи́зни** тормош маҡсаты **3.** (*разумная причина*) файҙа, рәт, мәғәнә; **како́й в э́том смысл?** бында ниндәй мәғәнә? ♦ **здра́вый смысл** айыҡ фекер, практик аң; **в по́лном смы́сле сло́ва** ысын мәғәнәһендә; **в смы́сле** *чего нимә* яғынан алғанда, йәһәтенән (яҡтан) ҡарағанда, мәғәнәһендә

**СМЫ́СЛИТЬ** *несов.*; *разг.*, *в разн. знач.* аңлау, төшөнөү, белеү; **ничего́ не смы́слю в му́зыке** музыкала бер нәмә лә аңламайым

**СМЫСЛОВО́Й,** -ая, -ое мәғәнә ...ы, мәғәнәүи; **смыслова́я па́мять** мәғәнәүи хәтер; **смыслова́я характери́стика сло́ва** һүҙҙең мәғәнәүи тасуирланышы

**СМЫТЬ** *сов. что* **1.** йыуыу, йыуҙырыу, йыуып төшөрөү (бөтөрөү, таҙартыу); **смыть грязь** бысраҡты йыуып төшөрөү **2.** ағыҙып алып китеү; **водо́й смы́ло ло́дку** һыу кәмәне ағыҙып алып киткән **3.** *перен.* (*уничтожить что-л. позорящее*) ғәйебен бөтөрөү, аҡланыу ♦ **как водо́й смы́ло** һыуға төшкәндәй юҡ булыу, ғәйеп булыу

**СМЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йыуылыу, йыуылып бөтөү (төшөү, китеү, таҙарыу); **кра́ска смы́лась** буяу йыуылып бөткән; **пятно́ с пла́тья смы́лось** күлдәктәге тап йыуылып таҙарған **2.** *перен.*, *прост.* шылыу, һыҙыу, һыпыртыу, табан ялтыратыу; **смы́ться с уро́ка** дәрестән һыпыртыу

**СМЫ́ЧКА** *ж* **1.** *см.* **сомкну́ть — смыка́ть** 1, **сомкну́ться — смыка́ться** 1; **2.** (*место*) ҡушылған урын, тоташҡан ер; **смы́чка сво́дов** көмбәҙҙәр тоташҡан ер **3.** *перен.* бәйләнеш, элемтә; **смы́чка го́рода с дере́вней** ҡала менән ауыл бәйләнеше

**СМЫЧКО́ВЫЙ,** -ая, -ое һыҙғыслы; **смычко́вый музыка́льный инструме́нт** һыҙғыслы музыка ҡоралы

**СМЫЧО́К I** *м* **1.** һыҙғыс, смычок; **смычо́к скри́пки** скрипка һыҙғысы **2.** (*инструмент для*

*трепания шерсти*) кереш; **трепа́ть шерсть смычко́м** йөндө кереш менән тетеү

**СМЫЧО́К II** *м*; *охот.* муйынсаҡ (*эттәрҙе ҡушарлап бәйләү өсөн ҡулланылған бау*)

**СМЫШЛЁНОСТЬ** *ж*; *разг.* аңлылыҡ, зирәклек

**СМЫШЛЁНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* аңлы, зирәк, аҡыллы, отҡор; **смышлёный ма́льчик** зирәк малай; **смышлёный взгляд** аҡыллы ҡараш

**СМЯГЧА́ТЬ** *несов. см.* **смягчи́ть**

**СМЯГЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **смягчи́ться** **2.** *страд. от* **смягча́ть**

**СМЯГЧА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **смягча́ть** **2.** *прил.* еңеләйтә торған; **смягча́ющие вину́ обстоя́тельства** ғәйепте еңеләйтә торған хәлшарттар **3.** *прил.* йомшарта торған; **смягча́ющие вещества́** йомшарта торған матдәләр

**СМЯГЧЕ́НИЕ** *с см.* **смягчи́ть — смягча́ть, смягчи́ться — смягча́ться**; **смягче́ние наказа́ния** язаның еңеләйтелеүе; **смягче́ние междунаро́дной напряжённости** халыҡ-ара көсөргәнештең йомшарыуы

**СМЯГЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* йомшартыу; **смягчи́ть ко́жу** күнде йомшартыу; **смягчи́ть волокно́** сүсте йомшартыу **2.** (*ослабить*) еңеләйтеү, кәметеү, йомшартыу, баҫыу; **смягчи́ть гнев** асыуҙы йомшартыу; **смягчи́ть боль** ауыртыуҙы баҫыу; **смягчи́ть наказа́ние** язаны еңеләйтеү **3.** *кого-что* (*сделать менее суровым*) тәбиғәтте (күңелде) йомшартыу **4.** (*сделать менее резким — о звуке, свете*) йомшартыу, кәметеү, тоноҡ итеү; **смягчи́ть свет** яҡтылыҡты кәметеү; **смягчи́ть го́лос** тауышты йомшартыу **5.** (*о климате*) епшетеү, йылытыу, епшетеп (йылытып) ебәреү (*һауа торошона ҡарата*)

**СМЯГЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йомшаҡҡа әйләнеү, йомшарып ҡалыу; **ко́жа от вы́делки смягчи́лась** тире иләгәндән һуң йомшарып ҡалды **2.** еңеләйеү, йомшарыу, баҫыла төшөү; **зубна́я боль смягчи́лась** теш ауыртыуы баҫыла төштө **3.** (*стать менее суровым*) күңел нескәреү, йомшара төшөү; **его́ хара́ктер смягчи́лся** уның холҡо йомшара төштө

**СМЯТЕ́НИЕ** *с* **1.** (*сильное волнение, тревога*) борсолоу тойғоһо, тыныслыҙлыҡ, тынғыһыҙлыҡ; **душе́вное смяте́ние** күңел тыныслыҙлығы **2.** (*замешательство*) бола, ығы-зығы, буталыш, сыуалыш; **смяте́ние в ряда́х проти́вника** дошмандар араһындағы ығы-зығы

**СМЯТЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое борсоулы, хәүефле, тыныслыҙ, тынғыһыҙ; **смяте́нный дух** тынғыһыҙ күңел

**СМЯТЬ** *сов.* **1.** *что* таушалдырыу, йомарлау, бөгәрләү, бөтәрләү, борһалау, ойпалап бөтөрөү; **смять пла́тье** күлдәкте таушалдырыу; **смять ска́терть** ашъяулыҡты бөтәрләү; **смять бума́гу** ҡағыҙҙы йомарлау **2.** иҙеү, тапау, баҫыу; **смять гли́ну** балсыҡ баҫыу; **смять траву́** үләнде тапау **3.** йәмшәйтеү; **смять шля́пу** эшләпәне йәмшәйтеү **4.** *перен.* ҡыҫырыҡлау, көс менән тарҡатыу; **смять вра́жеские войска́** дошман ғәскәрҙәрен ҡыҫырыҡлау

**СМЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** таушалыу, йомарланыу, бөгәрләнеү, ойпаланыу; **пла́тье смя́лось** күлдәк таушалған **2.** иҙелеү, тапалыу; **трава́ смя́лась** үлән тапалған

**СНАБДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тәьмин итеү; **снабди́ть оде́ждой и продово́льствием** кейемһалым һәм аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү **2.** *чем* (*сопроводить*) биреү, ҡушып биреү; **снабди́ть кни́гу рису́нками** китапҡа рәсемдәр биреү

**СНАБЖЕ́НЕЦ** *м* тәьминәтсе (*тәьмин итеүсе*)

**СНАБЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **снабди́ть — снабжа́ть**; **снабже́ние а́рмии вое́нной те́хникой** армияны хәрби техника менән тәьмин итеү **2.** тәьминәт, тәьмин итеү эше, тәьмин итеү саралары; **централизо́ванное снабже́ние** үҙәкләштерелгән тәьминәт **3.** (*предметы, продукты*) кәрәк-яраҡ; **продово́льственное снабже́ние** ашау кәрәк-ярағы

**СНАБЖЕ́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тәьминәт ...ы, тәьмин итеү ...ы; **снабже́нческая конто́ра** тәьминәт конторағы

**СНА́ДОБЬЕ** *с*; *разг.* дарыу, дауа

**СНА́ЙПЕР** *м* снайпер, мәргән

**СНА́ЙПЕРСКИЙ,** -ая, -ое снайпер ...ы, мәргән; **сна́йперская стрельба́** мәргән атыш

**СНАРУ́ЖИ** *нареч.* тыштан, тышҡы яҡтан; **запере́ть дом снару́жи** өйҙө тыштан бикләү

**СНАРЯ́Д** *м* **1.** снаряд, туп йәҙрәһе; **противота́нковый снаря́д** танкыға ҡаршы ата торған снаряд **2.** (*совокупность инструментов, приспособлений*; *техническое устройство*) ҡорал, ҡорамал; **снаря́д для буре́ния** быраулау ҡорамалы; **рыболо́вный снаря́д** балыҡ тотоу ҡоралдары **3.** снаряд; **снаря́д для гимнасти́ческих упражне́ний** гимнастика снаряды

**СНАРЯДИ́ТЬ** *сов. кого-что* кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү, әҙерләү; **снаряди́ть экспеди́цию** экспедицияны кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү

**СНАРЯДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* кәрәк-яраҡ менән тәьмин ителеү, әҙерләнеү; **снаряди́ться в путь** юлға әҙерләнеү

**СНАРЯЖА́ТЬ** *несов. см.* **снаряди́ть**

**СНАРЯЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **снаряди́ться** **2.** *страд. от* **снаряжа́ть**

**СНАРЯЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **снаряди́ть — снаряжа́ть, снаряди́ться — снаряжа́ться** **2.** кәрәк-яраҡ, ҡорал-ҡорамал, ҡорал, ҡорамал; **тури́стское снаряже́ние** турист кәрәк-яраҡтары

**СНАСТЬ** *ж* **1.** *собир.* кәрәк-яраҡ(тар), ҡорал-ҡорамал(дар), ҡоралдар, ҡорамалдар; **рыболо́вная снасть** балыҡ тотоу ҡоралдары **2.** *обычно мн.* **сна́сти**; *мор.* карап арҡандары, канаттар; **крепи́ть сна́сти** карап арҡандарын нығытыу

**СНАЧА́ЛА** *нареч.* **1.** башта, иң элек, иң әүәл; **снача́ла поду́май, пото́м отвеча́й** башта уйла,

шунан яуап бир **2.** (*снова*) яңынан, баштан; **нача́ть снача́ла** яңынан башлау

**СНА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **сноси́ть** I

**СНА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сноси́ться** I; **2.** *страд. от* **сна́шивать**

**СНЕГ** *м* ҡар; **пуши́стый снег** өрпәк ҡар; **мо́крый снег** еүеш ҡар; **хло́пья снега́** ҡар күбәләктәре ♦ **как прошлого́дний снег ну́жен** кәрәге бер тин, кәрәкле кишер япрағы, былтырғы ҡар кеүек кәрәк; **как снег на́ голову (упа́сть, свали́ться)** көтмәгәндә, ҡапыл, күктән төшкәндәй

**СНЕГИ́РЬ** *м* ҡыҙылтүш

**СНЕГО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡар" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **снегочи́стка** ҡар таҙартыу

**СНЕГОВО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡар ...ы; **снегово́й покро́в** ҡар ҡапламы; **снегова́я вода́** ҡар һыуы **2.** ҡар баҫҡан (ҡаплаған), ҡарлы; **снегова́я поля́на** ҡар баҫҡан аҡлан; **снеговы́е го́ры** ҡарлы тауҙар

**СНЕГОЗАДЕРЖА́НИЕ** *с* ҡар тотоу

**СНЕГООЧИСТИ́ТЕЛЬ** *м* ҡар таҙартҡыс (көрәгес)

**СНЕГООЧИСТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡар таҙартыу (көрәү) ...ы; **снегоочисти́тельная маши́на** ҡар таҙартыу машинаһы

**СНЕГОПА́Д** *м* ҡар яуыу; **си́льный снегопа́д** көслө ҡар яуыу

**СНЕГОТА́ЯНИЕ** *с* ҡар иреү

**СНЕГОУБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡар таҙартыу (көрәү, ташыу) ...ы; **снегоубо́рочные рабо́ты** ҡар таҙартыу эштәре

**СНЕГОХО́Д** *м* ҡаргиҙәр (*ҡарҙа йөрөй торған автомобиль*)

**СНЕГУ́РОЧКА** *ж*; *фольк.* Ҡарһылыу

**СНЕГУ́РОЧКИ** *мн.* коньки, тимертабан (*конькиҙың төрө*)

**СНЕДА́ТЬ** *несов. кого-что* ғазаплау, ғазап сиктереү, яфалау, йәберләү; **тоска́ снеда́ет** һағыш ғазаплай (яфалай)

**СНЕДЬ** *ж собир.* аш-һыу, аҙыҡ-түлек

**СНЕЖИ́НКА** *ж* ҡар бөртөгө (күҙе)

**СНЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡар ...ы; **сне́жный покро́в** ҡар япмаһы **2.** ҡар баҫҡан, ҡарлы; **сне́жная доро́га** ҡарлы юл; **сне́жные го́ры** ҡар баҫҡан тауҙар **3.** күп ҡарлы, ҡар күп яуған; **сне́жная зима́** ҡар күп яуған ҡыш **4.** (*похожий на снег по цвету, виду*) ҡар кеүек, ҡарҙай; **сне́жная белизна́** ҡарҙай аҡлыҡ; **сне́жная све́жесть** ҡарҙай сафлыҡ ♦ **сне́жная слепота́** *мед.* ҡар офтальмияһы, ҡарға күҙ сағылыу ауырыуы, ҡар һуҡырлығы (*ҡарлы урында оҙаҡ йәшәгәнлектән хасил булған күҙ сағылыу ауырыуы*); **сне́жный челове́к** ҡар кешеһе

**СНЕСТИ́** *сов. что* **1.** төшөрөп ҡуйыу; **снести́ мешо́к в по́греб** тоҡто мөгәрәпкә төшөрөп ҡуйыу **2.** (*отнести*) илтеү, илтеп ҡуйыу (биреү, һалыу, ташлау), алып барыу; **снести́ кни́ги в библио́теку** китаптарҙы китапханаға илтеп ҡуйыу **3.** (*сместить, увлекая силой своего движения, — о ветре*) аҡтарыу, ҡуптарыу, аҡтарып (ҡуптарып) алып ташлау; (*о воде*) ағыҙыу, ағыҙып алып китеү; **водо́й снесло́ дом** һыу өйҙө ағыҙған; **урага́н снёс кры́шу** дауыл ҡыйыҡты ҡуптарып ташлаған **4.** (*разрушить, уничтожить*) ватыу, емереү, һүтеү, һүтеп күсереү; (*о насаждениях*) сабып (өҙөп, киҫеп) ташлау, ҡырҡып бөтөрөү (ташлау); **снести́ ста́рый дом** иҫке йортто һүтеү; **снести́ сад** баҡсаны ҡырҡып ташлау **5.** (*переписать вниз*) аҫҡа төшөрөп (күсереп) яҙыу; **снести́ ци́фры** һандарҙы аҫҡа күсереп яҙыу **6.** *перен.* (*вытерпеть, выдержать*) түҙеү, сыҙау, түҙә (сыҙай) алыу, күтәреү; **не снести́ оби́ды** рәнйетеүҙе күтәрмәү **7.** *см.* **нести́** 9; **ку́рица снесла́ яйцо́** тауыҡ йомортҡа һалған

**СНЕСТИ́СЬ I** *сов.* (*установить связь*) хәбәрләшеү, хәбәр алышыу, бәйләнешкә (мөнәсәбәткә) инеү; **снести́сь по по́чте** почта аша хәбәрләшеү

**СНЕСТИ́СЬ II** *сов. см.* **нести́сь** 4

**СНЕТКО́ВЫЙ,** -ая, -ое күл сабағы ...ы; **снетко́вая уха́** күл сабағы һурпаһы

**СНЕТО́К** *м* күл сабағы

**СНИЖА́ТЬ** *несов. см.* **сни́зить**

**СНИЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сни́зиться** **2.** *страд. от* **снижа́ть**

**СНИЖЕ́НИЕ** *с см.* **сни́зить** — **снижа́ть**, **сни́зиться** — **снижа́ться**; **вести́ самолёт на сниже́ние** самолётты төшөрә башлау; **сниже́ние урожа́йности** уңыштың түбәнәйеүе

**СНИ́ЗИТЬ** *сов. что* **1.** кәметеү, төшөрөү; **сни́зить це́ны** хаҡты төшөрөү; **сни́зить давле́ние** баҫымды төшөрөү; **сни́зить ско́рость** тиҙлекте кәметеү; **сни́зить тре́бование** талапты кәметеү **2.** (*приглушить*) әкренәйтеү; **сни́зить звук** тауышты әкренәйтеү **3.** (*спустить ниже*) төшөрөү, түбәнәйтеү; **сни́зить вертолёт** вертолётты төшөрә башлау

**СНИ́ЗИТЬСЯ** *сов.* **1.** кәмеү, төшөү; **це́ны сни́зились** хаҡтар төштө; **температу́ра сни́зилась** температура төштө **2.** (*стать более низким, приглушённым — о голосе, звуке и т.п.*) әкренәйеү, түбәнәйеү **3.** (*спуститься ниже*) төшөү, түбәнәйеү; **самолёт сни́зился** самолёт түбәнәйҙе

**СНИЗОЙТИ́** *сов. к кому-чему, до кого-чего*; *книжн.* иғтибар (илтифат) итеү, ҡолаҡ һалыу; **снизойти́ к про́сьбе** үтенескә ҡолаҡ һалыу

**СНИ́ЗУ** *нареч.* **1.** аҫтан, түбәндән, аҫҡы (түбән) яҡтан; **сни́зу ду́ет** аҫтан ел өрә **2.** (*внизу*) аҫта, аҫ (түбән) яҡта; **сни́зу тума́н** аҫта томан **3.** (*с низовья реки*) йылға тамағынан, түбәндән, түбәнге яҡтан; **парохо́д идёт сни́зу** пароход түбәндән килә **4.** *перен.* (*со стороны широких слоёв населения*) түбәндән; **кри́тика сни́зу** түбәндән булған тәнҡит ♦ **сни́зу до́верху** түбәндән юғарыға тиклем, аҫтан өҫкә ҡәҙәр



14 зак. 2.0007.06

**СНИМА́ТЬ** *несов. см.* **снять**

**СНИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сня́ться** **2.** *страд. от* **снима́ть**

**СНИ́МОК** *м* **1.** *см.* **снима́ть** 9; **2.** фотоһүрәт, рәсем, һүрәт; **люби́тельский сни́мок** һәүәҫкәр төшөргән фотоһүрәт **3.** (*копия чего-л.*) күсермә (*берәй яҙманың, һүрәттең, һыҙманың күсерелгән данаһы*); **сни́мок с карти́ны** картинанан күсермә

**СНИСКА́ТЬ** *сов. что*; *книжн., уст.* ҡаҙаныу, өлгәшеү, ирешеү, лайыҡ булыу, килтереү; **сниска́ть уваже́ние** хөрмәт ҡаҙаныу

**СНИСХОДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ҡәтғи (талапсан) булмау, йомшаҡлыҡ; **прояви́ть изли́шнюю снисходи́тельность** артыҡ йомшаҡлыҡ күрһәтеү

**СНИСХОДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*благосклонный*) ҡәтғи (талапсан) -маған/-мәгән, йомшаҡ; **снисходи́тельный о́тзыв** йомшаҡ баһалама **2.** йомшаҡ (киң) күңелле, мәрхәмәтле, рәхимле; **снисходи́тельный челове́к** киң күңелле кеше **3.** (*покровительственно-высокомерный*) үтә һауалы (тәкәббер); **снисходи́тельное обраще́ние** үтә һауалы мөғәмәлә

**СНИСХОДИ́ТЬ** *несов. см.* **снизойти́**

**СНИСХОЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** (*терпимое отношение*) йомшаҡ мөғәмәлә, мәрхәмәт; **никако́го снисхожде́ния к престу́пникам** енәйәтселәргә бер ниндәй ҙә мәрхәмәт юҡ **2.** (*покровительственно-высокомерное отношение*) үтә һауалылыҡ (тәкәбберлек)

**СНИ́ТЬСЯ** *несов. кому* төшкә инеү, төштә күреү; **ча́сто сни́тся де́тство** йыш ҡына бала саҡ төшкә инә ♦ **и (во сне) не сни́лось** төшкә лә инмәгәйне, уй ҙа ла юҡ ине (булмағайны)

**СНОБ** *м* ҡупым, һауалы (*кейенеп-яһанып, танау буйына ҡарап йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә*)

**СНО́ВА** *нареч.* **1.** (*ещё раз*) ҡабаттан, ҡайтанан, тағы бер ҡат; **сно́ва включи́ть свет** ҡабаттан ут тоҡандырыу **2.** (*заново, вновь*) баштан, яңынан, иң тәүҙән; **сно́ва нача́ть рабо́ту** эште яңынан башлау

**СНОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *текст.* кәләпләй торған, кәләпләү ...ы; **снова́льная маши́на** кәләпләй торған машина

**СНОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *что*; *текст.* кәләпкә һалыу, кәләпләү, аяҡлау, еп оҙатыу; **снова́ть пря́жу** епте кәләпкә һалыу **2.** *перен.* арлы-бирле (тегеләй-былай) йөрөп тороу; **по реке́ снова́ли ло́дки** йылға буйлап кәмәләр тегеләй-былай йөрөп торҙо

**СНОВИДЕ́НИЕ** *с* төш, төш күреү

**СНОГСШИБА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ғәжәпкә ҡалдырырлыҡ, шаҡ ҡатырғыс, таң ҡалдырырлыҡ; **сногсшиба́тельная но́вость** шаҡ ҡатырғыс яңылыҡ

**СНОП** *м* **1.** көлтә; **ржано́й сноп** арыш көлтәһе; **вяза́ть снопы́** көлтә бәйләү **2.** *чего*; *перен.* (*поток лучей, пламени и т.д.*) шәлкем; **снопы́ со́лнечных луче́й** ҡояш нурҙары шәлкеме

**СНОПО́ВЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* көлтәләнгән, көлтәгә һалынған, көлтәлә; **снопо́вая су́шка хле́ба** ашлыҡты көлтәлә киптереү

**СНОПОВЯЗА́ЛКА** *ж* көлтә бәйләгес, көлтә бәйләү машинаһы

**СНОПОВЯЗА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое көлтә ...ы, көлтә бәйләй торған; **сноповяза́льный шпага́т** көлтә ебе (бауы)

**СНОРОВИ́СТЫЙ** и **СНОРО́ВИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* таһыллы, оҫолло, эш-хәрәкәткә ипле, булдыҡлы; **сноровиśтый па́рень** оҫолло егет

**СНОРО́ВКА** *ж* оҫоллоҡ, таһыллыҡ, маһирлыҡ, булдыҡлылыҡ; **приобрести́ сноро́вку** таһыллыҡҡа эйә булыу

**СНОС I: сно́су (сно́са) нет** *чему*; **сно́су (сно́са) не зна́ет** *что* бик ныҡ, туҙмай торған, туҙыуҙы белмәй торған (*кейем-һалымға ҡарата*)

**СНОС II** *м см.* **снести́ — сноси́ть** II 3, 4 ♦ **на сно́сях** *прост.* һуңғы көндәрен йөрөгән (*йөклө ҡатынға ҡарата*)

**СНОСИ́ТЬ I** *сов. что*; *разг.* туҙҙырыу, кейеп туҙҙырыу; **сноси́ть сапоги́** итекте кейеп туҙҙырыу

**СНОСИ́ТЬ II** *несов. см.* **снести́** 1, 3–5, 7

**СНОСИ́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* **1.** туҙыу, кейелеп туҙыу; **ва́ленки сноси́лись** быйма туҙҙы **2.** *спец.* (*износиться — о машине, механизме*) эштән сығыу, туҙыу; **обору́дование заво́да сноси́лось** завод ҡорамалдары эштән сыҡты

**СНОСИ́ТЬСЯ II** *несов. см.* **снести́сь** I

**СНОСИ́ТЬСЯ III** *несов. страд. от* **сноси́ть** II

**СНО́СКА** *ж* **1.** *см.* **снести́ — сноси́ть** II 1, 4, 5; **2.** төшөрмә (*төп текстан тыш бит аҫтына төшөрөп яҙылған ҡушымта*)

**СНО́СНЫЙ,** -ая, -ое ярарлыҡ, түҙерлек; **сно́сные усло́вия** түҙерлек шарттар

**СНОТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йоҡлата торған, йоҡоно килтерә торған, йоҡлатҡыс; **снотво́рный порошо́к** йоҡлата торған онтаҡ **2.** *в знач. сущ.* **снотво́рное** *с* йоҡлата торған (йоҡлатҡыс) дарыу

**СНОХА́** *ж* килен

**СНОШЕ́НИЕ** *с* **1.** бәйләнеш, мөнәсәбәт; **диплома́тические сноше́ния** дипломатик мөнәсәбәттәр; **торго́вые сноше́ния** сауҙа бәйләнештәре **2.** (*половой акт*) енси мөнәсәбәт, енси яҡынлыҡ

**СНУ́ЛЫЙ,** -ая, -ое йәнһеҙ, үле (*балыҡҡа ҡарата*)

**СНЮ́ХАТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о животных*) еҫкәшеү, еҫкәшеп табышыу **2.** *перен.* (*вступить в близкие отношения*) танышып (килешеп, дуҫлашып) китеү, яҡынлашыу, яҡынайыу

**СНЯ́ТИЕ** *с см.* **снять**, **сня́ться**; **сня́тие урожа́я** уңыш йыйыу; **сня́тие блока́ды** ҡамауҙан сығыу; **сня́тие суди́мости** хөкөм ителгәнлекте бөтөрөү

**СНЯТО́Й: снято́е молоко́** өҫтө алынған һөт

**СНЯТЬ** *сов. что* **1.** алыу, алып ҡуйыу; **снять кни́гу с по́лки** кәштәнән китапты алыу; **снять карти́ну со стены́** стенанан картинаны алыу; **снять телефо́нную тру́бку** телефон трубкаһын алыу **2.** (*отделить*) һурып (һүтеп) алыу; **снять колесо́ с теле́ги** арбаның тәгәрмәсен алыу **3.** сисеү, һалыу, систереү; **снять костю́м** костюм һалыу; **снять сапоги́** итек сисеү; **снять пальто́** пальто сисеү **4.** (*упразднить что-л. назначенное*) бөтөрөү, юҡҡа сығарыу, алыу; **снять вы́говор** шелтәне алыу; **снять блока́ду** блокаданы бөтөрөү **5.** (*стирая, срезая, удалить*) ҡырҡып (тунап, әрсеп, һөҙөп һ.б.) алыу; **снять шку́ру** тиреһен тунап алыу; **снять грим** гримды һөртөп алыу; **снять ко́жицу с колбасы́** колбасаның тышын (ярыһын) әрсеп алыу **6.** (*собрать*) йыйыу, йыйып алыу; **снять урожа́й** уңыш йыйып алыу **7.** (*отстранить*) алыу, төшөрөү, сығарыу, сығарып ебәреү; **снять с рабо́ты** эштән сығарыу; **снять с учёта** учёттан төшөрөү **8.** (*отменить*) алыу, кире алыу, алып ташлау, ғәмәлдән сығарыу; **снять вопро́с с пове́стки дня** мәсьәләне көн тәртибенән алып ташлау; **снять своё предложе́ние** тәҡдимеңде кире алыу **9.** (*точно воспроизвести*) үлсәмен (күсермәһен) алыу, төшөрөү, төшөрөп алыу; **снять ме́рку с головы́** баш үлсәмен алыу **10.** (*взять внаём*) (ваҡытлыса) файҙаланыуға алыу (алып тороу); (*о квартире, комнате*) фатирға инеү, кеше фатирында тороу **11.** фотоға (киноға) төшөрөү (төшөрөп алыу); **снять кинофи́льм** кинофильм төшөрөү **12.** *что* и *без доп.* кәрт асыу (*кәрт уйынында*) ♦ **как руко́й сня́ло** ҡул менән һыпырып ташлағандай булды (*ауырыуға, ҡайғы-хәсрәткә ҡарата*); **снять боль** ауыртыуҙы баҫыу; **снять го́лову**: 1) ҡаты яза биреү; 2) башын ашау, һәләк итеү; **снять допро́с** һорау алыу; **снять обвине́ние** ғәйепһеҙ тип табыу, аҡлау, ғәйепләмәү

**СНЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** алыныу, һурылыу, һурылып сығыу; **дверь сняла́сь с пе́тель** ишек күгәненән һурылып сыҡҡан; **топо́р сня́лся с топори́ща** балта һабы һурылып сыҡҡан **2.** (*стащиться — об одежде, обуви*) сиселеү; **перча́тка легко́ сняла́сь** бирсәткә еңел сиселде **3.** (*о судне*) ҡуҙғалыу, юлға сығыу **4.** төшөү; **сня́ться в кино́** киноға төшөү **5.** (*тронуться в путь*) юлға сығыу, сығып китеү

**СО** *предлог см.* **с**

**СО...** *приставка*; *исем һәм сифаттар алдына ҡушылып, эштәге берлекте белдерә, мәҫ.*, **соа́втор** авторҙаш; **совме́стный** бергә

**СОА́ВТОРСТВО** *с* авторҙашлыҡ

**СОБА́КА** *ж* эт; **охо́тничья соба́ка** һунар эте; **сторожева́я соба́ка** һаҡсы эт; **поро́дистая соба́ка** тоҡомло (яҡшы нәҫелле) эт ♦ **соба́ка ла́ет, ве́тер но́сит** эт өрөр, бүре йөрөр; **вот где соба́ка зары́та** бына ҡайҙа икән бәлә башы, бына уның сере ҡайҙа икән; **(как) соба́ка на се́не** үҙенә лә юҡ, кешегә лә юҡ; **соба́ку съе́л** сәсе ағарған, теше төшкән (*берәй эштә оҙаҡ эшләп тәжрибә туплаған кешегә ҡарата*); **устать как соба́ка** эттәй арыу, арманһыҙ булыу; **как ко́шка с соба́кой** *см.* **ко́шка**

**СОБАКОВО́Д** *м* эт аҫрау белгесе

**СОБАКОВО́ДСТВО** *с* эт аҫраусылыҡ

**СОБА́ЧИЙ,** -ья, -ье **1.** *прям., перен.* эт ...ы; **соба́чий лай** эт өрөүе; **соба́чья конура́** эт ояһы; **соба́чий хо́лод** сатнама һыуыҡ; **соба́чья жизнь** эт тормошо, эт көнө (*йәбер-золом күп булған ауыр тормош*) **2.** эт тиреһенән тегелгән; **соба́чьи у́нты** эт тиреһенән тегелгән унтылар ♦ **соба́чий нюх** *прост.* эт һиҙгерлеге (*бөтә нәмәне һиҙеп, белеп торған кешегә ҡарата әйтелә*)

**СОБА́ЧИНА** *ж* **1.** (*мясо*) эт ите **2.** (*шкура*) эт тиреһе **3.** *разг.* эт йөнө, эт еҫе; **па́хнуть соба́чиной** эт еҫе килеү

**СОБА́ЧКА** *ж* **1.** *уменьш.-ласк. от* **соба́ка** **2.** тел, тәте (*мылтыҡта һәм башҡа механизмдарҙағы махсус яйланма*); **соба́чка револьве́ра** револьвер тәтеһе

**СОБА́ЧНИК** *м*; *разг.* **1.** эт яратыусы (*кеше*) **2.** эт тотоусы, эт йыйыусы (*кеше*) **3.** эт өйө (*эттәрҙе өйрәнә торған ғилми-тикшеренеү урыны*)

**СОБЕЗЬЯ́ННИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* ҡыланып (маймылланып) кейенеү (үҙеңде тотоу һ.б.)

**СОБЕ́С** *м* **1.** (*социальное обеспечение*) социаль тәьминәт **2.** (*учреждение*) социаль тәьминәт йорто

**СОБЕСЕ́ДНИК** *м* и **СОБЕСЕ́ДНИЦА** *ж* әңгәмәләш, ултырҙаш

**СОБЕСЕ́ДОВАНИЕ** *с* әңгәмә; **проводи́ть собесе́дование** әңгәмә үткәреү, әңгәмәләшеү

**СОБЕСЕ́ДОВАТЬ** *несов.* әңгәмә үткәреү, әңгәмәләшеү; **собесе́довать с уча́щимися** уҡыусылар менән әңгәмәләшеү

**СОБИРА́НИЕ** *с см.* **собира́ть**

**СОБИРА́ТЕЛЬ** *м* и **СОБИРА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* йыйыусы, туплаусы; **собира́тель наро́дных пе́сен** халыҡ йырҙарын йыйыусы

**СОБИРА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* дөйөмлөк, дөйөмләштерелгәнлек; **собира́тельность о́браза** образдың дөйөмлөгө

**СОБИРА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дөйөмләштерелгән; **собира́тельный о́браз** дөйөмләштерелгән образ **2.** *грам.* йыйнау ...ы; **собира́тельные числи́тельные** йыйнау һандары; **собира́тельные имена́ существи́тельные** йыйнау исемдәре

**СОБИРА́ТЬ** *несов. см.* **собра́ть**

**СОБИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **собра́ться** **2.** *страд. от* **собира́ть**

**СОБЛАГОВОЛИ́ТЬ** *сов. с неопр.*; *ирон.* рәхим итеп эшләү (үтәү, башҡарыу, килеү һ.б.); **он соблаговоли́л прийти́** ул рәхим итеп килде; **соблаговоли́те отве́тить** рәхим итеп яуап бирегеҙ

**СОБЛА́ЗН** *м* ҡыҙыҡтырғыс, күңел әүрәткес (аҙҙырғыс) нәмә, вәсүәсә; **вводи́ть в собла́зн** *кого-л. кемделер* ҡыҙыҡтырыу

**СОБЛАЗНИ́ТЕЛЬ** *м* и **СОБЛАЗНИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* күңел әүрәтеүсе (аҙҙырыусы), вәсүәсә һалыусы, вәсүәсәсе

**СОБЛАЗНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡтырғыс, ымһындырғыс, ҡыҙыҡтырырлыҡ, күңел әүрәткес (аҙҙырғыс), вәсүәсәле; **соблазни́тельное предложе́ние** ҡыҙыҡтырғыс тәҡдим

**СОБЛАЗНИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡыҙыҡтырыу, ымһындырыу, ҡыҙығыу тойғоһо уятыу, әүрәтеү; **соблазни́ть деньга́ми** аҡса менән ҡыҙыҡтырыу; **соблазни́ть пое́хать на юг** көньяҡҡа барырға ҡыҙыҡтырыу **2.** (*прельстить собой, обольстить*) күңелен тартыу (биләү), әүрәтеү; **соблазни́ть свое́й красото́й** матурлығы менән әүрәтеү **3.** (*совратить*) аҙҙырыу

**СОБЛАЗНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡыҙығыу, ымһыныу, күңел төшөү, күҙ ҡыҙыу; **соблазни́ться на лёгкий за́работок** еңел аҡсаға ҡыҙығыу **2.** *с неопр.* и *без доп.* аҙыу, әхлаҡһыҙға әйләнеү, боҙолоу

**СОБЛАЗНЯ́ТЬ** *несов. см.* **соблазни́ть**

**СОБЛАЗНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **соблазни́ться** **2.** *страд. от* **соблазня́ть**

**СОБЛЮДА́ТЬ** *несов. что* **1.** һаҡлау, тотоу; **соблюда́ть поря́док** тәртип һаҡлау; **соблюда́ть дие́ту** диета тотоу **2.** һаҡлау, үтәү, күҙәтеү, тотоу; **соблюда́ть досто́инство** үҙ дәрәжәңде һаҡлау

**СОБЛЮДЕ́НИЕ** *с см.* **соблюда́ть** – **соблюсти́**; **соблюде́ние интере́сов госуда́рства** дәүләт мәнфәғәттәрен күҙәтеү; **соблюде́ние режи́ма дня** көн тәртибен үтәү

**СОБЛЮСТИ́** *сов. см.* **соблюда́ть**, **блюсти́**

**СОБОЛЕ́ЗНОВАНИЕ** *с* ҡайғы уртаҡлашыу, тәғзиә

**СОБОЛЕ́ЗНОВАТЬ** *несов. кому-чему* и *без доп.* ҡайғы уртаҡлашыу, тәғзиә ҡылыу

**СОБО́ЛИЙ,** -ья, -ье **1.** кеш ...ы; **собо́лий мех** кеш тиреһе; **собо́лья нора́** кеш өңө **2.** кеш, кеш тиреһенән тегелгән (эшләнгән); **собо́лья ша́пка** кеш бүрек

**СОБОЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** кеш ...ы; **соболи́ный запове́дник** кеш ҡурсаулығы; **соболи́ный след** кеш эҙе **2.** кеш, кеш тиреһенән тегелгән (эшләнгән) **3.** *перен., трад.-поэт.* (*густой, тёмный – о бровях*) ҡарағусҡыл ҡуйы; **соболи́ные бро́ви** ҡарағусҡыл ҡуйы ҡаш

**СО́БОЛЬ** *м* **1.** (*мн.* **со́боли** и **соболя́**) кеш (*һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған ҡараһыу көрән төҫтәге аҫыл тиреле йырткыс йәнлек*) **2.** (*мн.* **соболя́**) (*мех*) кеш тиреһе

**СОБО́Р** *м* собор (**1.** *тар. революцияға тиклем Рәсәйҙә ойоштороу һәм идара мәсьәләләрен хәл итеү өсөн саҡырыла торған йыйылыш* **2.** *юғары христиан руханиҙары йыйылышы* **3.** *ҡаланың йәки монастырҙың иң ҙур сиркәүе*)

**СОБО́РНЫЙ,** -ая, -ое собор ...ы; **собо́рное постановле́ние** собор ҡарары; **собо́рный ко́локол** собор ҡыңғырауы

**СОБРА́НИЕ** *с* **1.** йыйылыш; **роди́тельское собра́ние** ата-әсәләр йыйылышы; **провести́ собра́ние** йыйылыш үткәреү **2.** (*в названии некоторых учреждений*) йыйын (*йәмғиәттең ниндәйҙер мәсьәләне ҡарау өсөн йыйылған йыйылышы*); **Национа́льное собра́ние** Милли йыйын **3.** (*коллекция*) йыйылма, тупланма; **собра́ние минера́лов** минералдар йыйылмаһы; **собра́ние дре́вних моне́т** боронғо тәңкәләр йыйылмаһы **4.** йыйынтыҡ; **по́лное собра́ние сочине́ний** әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы

**СО́БРАННОСТЬ** *ж* йыйнаҡлыҡ, диҡҡәтлелек, иғтибарлылыҡ; **со́бранность вое́нных** хәрбиҙәрҙең йыйнаҡлығы; **со́бранность учи́теля** уҡытыусының иғтибарлылығы

**СО́БРАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **собра́ть** **2.** *прил.* (*умеющий сосредоточить свои мысли, волю, чувства*) диҡҡәтле, иғтибарлы; **со́бранный ребёнок** диҡҡәтле бала **3.** *прил.* (*подтянутый*) ыҡсым, йыйнаҡ; **со́бранный челове́к** йыйнаҡ кеше

**СОБРА́Т** *м* иптәш, -даш/-дәш; **собра́т по ору́жию** ҡоралдаш; **собра́т по иску́сству** моңдаш

**СОБРА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* йыйыу, йыйнау, йыйып алыу; **собра́ть люде́й** кешеләрҙе йыйыу; **собра́ть госте́й** ҡунаҡтар йыйыу **2.** йыйыу, йыйып (сүпләп, тиреп) алыу; **собра́ть я́годы** еләк тиреп алыу; **собра́ть урожа́й** уңыш йыйып алыу; **собра́ть грибы́** бәшмәк йыйыу **3.** ҡороу, йыйыу, көйләү; **собра́ть сепара́тор** сепаратор ҡороу; **собра́ть радиоприёмник** радиоалғыс йыйыу **4.** *разг.* (*приготовить для чего-л.*) әҙерләү, әҙерлек хәстәрен күреү, йыйындырыу; **собра́ть дете́й в шко́лу** балаларҙы мәктәпкә әҙерләү **5.** йыйыу, берәмләп туплау (булдырыу); **собра́ть ма́рки** маркалар йыйыу; **собра́ть стари́нные ру́кописи** боронғо ҡулъяҙмалар туплау **6.** (*сделать сборки*) бөрөү, бөрмә яһау; **собра́ть пла́тье в та́лии** күлдәктең билен бөрөү **7.** (*при голосовании*) алыу, яулау, ирешеү; **собра́ть большинство́ голосо́в** күпселек тауыш алыу **8.** *перен.* (*напрячь*) йыйнау, туплау, күбәйтеү; **собра́ть все си́лы** бөтә көстө туплау; **собра́ть мы́сли** фекер туплау

**СОБРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йыйылыу, йыйналыу, йыйылышыу; **лю́ди собрали́сь о́коло па́мятника** кешеләр һәйкәл тирәһенә йыйылған; **го́сти собрали́сь во́время** ҡунаҡтар ваҡытында йыйылды **2.** (*скопиться*) тупланыу, йыйылыу; **собрало́сь мно́го газе́т** күп гәзит йыйылған **3.** (*приготовиться*) әҙерләнеү, йыйыныу; **собра́ться в теа́тр** театрға йыйыныу; **собра́ться в доро́гу** юлға сығырға әҙерләнеү **4.** *с чем* (*напрячь – о силах, мыслях*) йыйыу, туплау; **собра́ться с мы́слями** фекер туплау; **собра́ться с си́лами** (барлыҡ) көстө туплау

**СО́БСТВЕННИК** *м* и **СО́БСТВЕННИЦА** *ж* милексе, милек эйәһе, хужа; **со́бственник да́чи** дача хужаһы

**СО́БСТВЕННИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** милексенең, хужаның **2.** хосуси милек эйәләренә хас (булған), хосуси милекселек ...ы; **собственническая психоло́гия** хосуси милекселек психологияһы

**СО́БСТВЕННО 1.** *вводн. сл.* (*в сущности*) асылда, ысынында, ғәмәлдә, дөрөҫөн әйткәндә; **со́бственно, он прав** асылда, ул хаҡлы **2.** *огранич. частица* (*в буквальном смысле слова*) ысын мәғәнәһендә ♦ **со́бственно говоря́** *см.* **со́бственно** 1

**СОБСТВЕННОРУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое үҙ ҡулы менән -ған/-гән; **собственнору́чная запи́ска** үҙ ҡулы менән яҙылған ҡулхат

**СО́БСТВЕННОСТЬ** *ж* милек; **ча́стная со́бственность** хосуси милек; **обще́ственная со́бственность** йәмғиәт милке

**СО́БСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*являющийся собственностью*) үҙ, үҙенеке; **со́бственный дом** үҙ йорто **2.** (*свой, личный*) шәхси, үҙ; **со́бственное мне́ние** шәхси фекер; **ви́деть со́бственными глаза́ми** үҙ күҙҙәре менән күреү **3.** (*буквальный, настоящий*) ысын, тура, үҙ; **в со́бственном смы́сле сло́ва** һүҙҙең тура мәғәнәһендә **4.** *спец.* саф, таҙа, үҙ; **со́бственный вес** үҙ ауырлығы (*нәмәнең һауыттан башҡа булған саф ауырлығы*) ♦ **и́мя со́бственное** *грам.* яңғыҙлыҡ исем; **в со́бственные ру́ки (отда́ть)** үҙенә (үҙ ҡулына) тапшырыу; **со́бственный корреспонде́нт** үҙ хәбәрсе; **вари́ться в со́бственном соку́** *см.* **вари́ться**

**СОБУТЫ́ЛЬНИК** *м*; *разг.* бергә эсеүсе, шешәләш

**СОБЫ́ТИЕ** *с* **1.** ваҡиға, хәл; **истори́ческое собы́тие** тарихи ваҡиға; **неожи́данное собы́тие** көтөлмәгән хәл; **собы́тия после́дних дней** һуңғы көндәрҙә булған хәлдәр **2.** оло ваҡиға, иҫтәлекле хәл (күренеш); **его́ прие́зд к нам — собы́тие** уның беҙгә килеүе — оло ваҡиға

**СОВА́** *ж* өкө, ябалаҡ

**СОВА́ТЬ** *несов. что*; *разг.* **1.** тығыу; **сова́ть ру́ки в карма́ны** ҡулдарҙы кеҫәгә тығыу **2.** ҡыҫтырыу, тығыу, һалып (ҡыҫтырып) ҡуйыу; **сова́ть ве́щи в чемода́н** әйберҙәрҙе сумаҙанға тығыу **3.** йәшертеп (яйһыҙ, ҡабалан) биреү, тығыу; **сова́ть цветы́** сәскәне яйһыҙ биреү ♦ **сова́ть (свой) нос** морон тығыу, ҡыҫылыу (*кеше эшенә*)

**СОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* тығылыу, ҡыҫылыу; **сова́ться в чужи́е дела́** кеше эшенә тығылыу **2.** *страд. от* **сова́ть**

**СОВЁНОК** *м* өкө (ябалаҡ) балаһы

**СОВЕРША́ТЬ** *несов. см.* **соверши́ть**

**СОВЕРША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **соверши́ться** **2.** *страд. от* **соверша́ть**

**СОВЕРШЕ́ННО** *нареч.* **1.** (*целиком, полностью*) бөтөнләй, тамам, һис тә, бер ҙә; **рабо́та соверше́нно гото́ва** эш тамам әҙер; **он соверше́нно огло́х** ул бөтөнләй ишетмәй **2.** *разг.* (*совсем*) тома, дөм, шыр, ҡоп-, шәп-, япа-, сеп-, типә-; **соверше́нно сыро́й** сеп-сей; **соверше́нно одино́кий** япа-яңғыҙ; **соверше́нно ро́вный** тип-тигеҙ; **соверше́нно сухой** ҡоп-ҡоро; **соверше́нно но́вый** өр-яңы; **соверше́нно слепо́й** тома һуҡыр

**СОВЕРШЕННОЛЕ́ТИЕ** *с* буйға етеү, балиғ булыу

**СОВЕРШЕННОЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее буйға еткән, балиғ, йәше еткән

**СОВЕРШЕ́ННЫЙ I,** -ая, -ое **1.** (*безукоризненный*) камил, һәр яҡлап килгән; **соверше́нный челове́к** һәр яҡлап килгән кеше **2.** (*полный, абсолютный*) тулыһы (бөтөнләйе) менән; **соверше́нное схо́дство** тулыһы менән оҡшашлыҡ **3.** *разг.* (*подлинный*) ысын, ысын мәғәнәһендә, тулыһынса, бөтөнләй; **соверше́нная пра́вда** ысын хәҡиҡәт

**СОВЕРШЕ́ННЫЙ II: соверше́нный вид** *грам.* тамамланған төр (*славян һ.б. телдәрҙә ҡылымдың төп грамматик билдәһе*)

**СОВЕРШЕ́НСТВО** *с* камиллыҡ, камил хәл, теүәллек, камил (юғары кимәлдә, тейешле дәрәжәлә) булыу; **соверше́нство рабо́ты** эштең юғары кимәлдә булыуы; **в соверше́нстве владе́ть иностра́нным языко́м** сит телде камил белеү

**СОВЕРШЕ́НСТВОВАТЬ** *несов. что* камиллаштырыу, яҡшыртыу; **соверше́нствовать свои́ зна́ния** белемеңде камиллаштырыу; **соверше́нствовать ме́тоды руково́дства** етәкселек итеү ысулдарын камиллаштырыу

**СОВЕРШЕ́НСТВОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** камиллашыу, яҡшырыу; **тала́нт ученика́ соверше́нствуется** уҡыусының таланты камиллаша бара **2.** *страд. от* **соверше́нствовать**

**СОВЕРШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡылыу, яһау, эшләү; **соверши́ть путеше́ствие** сәйәхәт итеү; **соверши́ть оши́бку** хата яһау; **соверши́ть преступле́ние** енәйәт ҡылыу; **соверши́ть по́двиг** батырлыҡ эшләү; **соверши́ть поса́дку** ергә төшөү (*самолётҡа ҡарата*) **2.** (*исполнить обряд*) башҡарыу, ҡылыу, уҡыу; **соверши́ть богослуже́ние** ғибәҙәт ҡылыу; **соверши́ть нама́з** намаҙ уҡыу **3.** *офиц.* (*заключить, оформить*) килешеү, килешеүгә ҡул ҡуйыу; **соверши́ть сде́лку** алыш-бирешкә килешеү

**СОВЕРШИ́ТЬСЯ** *сов.* булыу, килеп сығыу, үтәлеү, атҡарылыу **соверши́лась катастро́фа** катастрофа булды

**СО́ВЕСТИТЬ** *несов. кого*; *разг.* оялтыу, оятҡа ҡалдырыу

**СО́ВЕСТИТЬСЯ** *несов. кого*; *разг.* уңайһыҙлыҡ тойоу, тартыныу, оялыу

**СО́ВЕСТЛИВОСТЬ** *ж* намыҫлылыҡ, выждандылыҡ

**СО́ВЕСТЛИВЫЙ,** -ая, -ое намыҫлы, выжданлы, оялсан, намыҫсан; **со́вестливый челове́к** намыҫлы кеше

**СО́ВЕСТНО** *кому в знач. сказ., безл.* оят, уңайһыҙ; **как вам не со́вестно?** һеҙгә оят түгелме?; **мне за вас со́вестно** һеҙҙең өсөн миңә оят

**СО́ВЕСТЬ** *ж* выждан, намыҫ, оят; **долг со́вести** выждан бурысы; **моя́ со́весть чиста́** намыҫым таҙа; **испы́тывать угрызе́ния со́вести** выждан ғазабы кисереү ♦ **без зазре́ния со́вести** *см.* **зазре́ние**; **для очи́стки со́вести** *см.* **очи́стка**; **идти́ (поступа́ть) про́тив свое́й со́вести** намыҫҡа ҡаршы килеү; **на со́весть** намыҫ менән (күңел биреп, яҡшы итеп) эшләү; **не за страх, а за со́весть (де́лать)** күңел биреп (һалып), ысын күңелдән (эшләү); **ни стыда́ ни со́вести** *см.* **стыд**; **по со́вести говоря́ (сказа́ть)** *в знач. вводн. сл.* ысынын (дөрөҫөн) әйткәндә; **свобо́да со́вести** выждан иреклеге (азатлығы) (*кешенең динде тотоу-тотмауы үҙ теләгендә булыу*); **со споко́йной со́вестью** тыныс күңел менән

**СОВЕ́Т** *м* **1.** кәңәш, мәслихәт; **сове́т врача́** табип кәңәше; **дать сове́т** кәңәш биреү; **после́довать сове́ту** кәңәш тотоу; **обрати́ться за сове́том** кәңәш һорап мөрәжәғәт итеү **2.** кәңәшмә, әңгәмә; **на семе́йном сове́те** ғаилә кәңәшмәһендә **3.** совет; **Верхо́вный Сове́т СССР** СССР-ҙың Юғары Советы; **учёный сове́т институ́та** институттың ғилми советы ♦ **сове́т да любо́вь** татыу йәшәгеҙ, бәхетле булығыҙ (*өйләнешеүселәргә ҡарата әйтелгән теләк*)

**СОВЕ́ТНИК** *м* **1.** (*советчик*) кәңәшсе **2.** кәңәшсе, советник; **вое́нный сове́тник** хәрби кәңәшсе; **сове́тник посо́льства** илселек советнигы

**СОВЕ́ТНИЦА** *ж* кәңәшсе

**СОВЕ́ТОВАТЬ** *несов. что* и *с неопр.* кәңәш биреү (итеү), мәслихәт биреү (күреү); **я сове́тую вам отдохну́ть** мин һеҙгә ял итеп алырға кәңәш бирәм

**СОВЕ́ТОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** кәңәш һорау, кәңәшләшеү; **сове́товаться с юри́стом** юрист менән кәңәшләшеү **2.** (*совещаться*) әңгәмәләшеү, кәңәшләшеү, фекер алышыу, үҙ-ара уйлашыу (һөйләшеү)

**СОВЕ́ТСКИЙ,** -ая, -ое совет ...ы; **сове́тская власть** совет власы

**СОВЕ́ТЧИК** *м* и **СОВЕ́ТЧИЦА** *ж* кәңәшсе, кәңәш (аҡыл) биреүсе

**СОВЕЩА́НИЕ** *с* кәңәшмә; **совеща́ние учителе́й** уҡытыусылар кәңәшмәһе

**СОВЕЩА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кәңәш итеү (кәңәшләшеү) ...ы ♦ **совеща́тельный го́лос** кәңәшләшеү хоҡуғы

**СОВЕЩА́ТЬСЯ** *несов.* кәңәшләшеү, фекер алышыу

**СОВИ́К** *м* совик (*Алыҫ Төньяҡ халыҡтарында тиренән тегелгән ирҙәр кейеме*)

**СОВИ́НЫЙ,** -ая, -ое өкө ...ы, ябалаҡ ...ы; **сови́ное гнездо́** өкө ояһы; **сови́ный крик** өкө тауышы

**СО́ВКА** *ж* **1.** (*птица*) өкө **2.** (*бабочка*) өкөбаш күбәләк, төн күбәләге; **со́вка капу́стная** кәбеҫтә күбәләге; **со́вка ози́мая** ужым күбәләге; **со́вка сосно́вая** өкөбаш күбәләк

**СОВЛАДА́ТЬ** *сов. с кем-чем*; *разг.* тыйып (еңеп, тотоп) ҡалыу, ҡулға алыу; **совлада́ть с гне́вом** асыуҙы тыйып ҡалыу; **совлада́ть с собо́й** үҙ-үҙеңде ҡулға алыу

**СОВЛАДЕ́ЛЕЦ** *м* и **СОВЛАДЕ́ЛИЦА** *ж* милектәш, уртаҡ маллы кешеләр

**СОВЛЕКА́ТЬ** *несов. см.* **совле́чь**

**СОВЛЕКА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **совлека́ть**

**СОВЛЕ́ЧЬ** *сов. кого-что*; *книжн.* (юлдан) тайпылдырыу (яҙҙырыу) ♦ **совле́чь с пути́ (и́стинного)** дөрөҫ юлдан яҙҙырыу

**СОВМЕСТИ́МОСТЬ** *ж* тура (тап) килеү, үҙ-ара ярашыу; **совмести́мость поня́тий** төшөнсәләрҙең тура килеүе; **психологи́ческая совмести́мость** психологик яҡтан үҙ-ара ярашыу ♦ **совмести́мость кро́ви** *биол.* ҡандың тура килеүе (*ҡан ебәргәндә*)

**СОВМЕСТИ́МЫЙ,** -ая, -ое тура (тап) килә торған, бергә һыйыша (ҡушыла) алырлыҡ

**СОВМЕСТИ́ТЕЛЬ** *м* и **СОВМЕСТИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* бер үк ваҡытта (бер нисә урында) эшләүсе, бер нисә эште башҡарыусы

**СОВМЕСТИ́ТЕЛЬСТВО** *с* бер үк ваҡытта (бер нисә урында) эшләү, бер нисә эште башҡарыу; **рабо́тать по совмести́тельству секретарём** бер үк ваҡытта секретарь булып эшләү

**СОВМЕСТИ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов.* бер үк ваҡытта (бер нисә урында) эшләү, бер нисә эште башҡарыу

**СОВМЕСТИ́ТЬ** *сов. см.* **совмеща́ть**

**СОВМЕСТИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **совмеща́ться**

**СОВМЕ́СТНО** *нареч.* бергәләп, берләшеп, берлектә, уртаҡ; **совме́стно обсуди́ть вопро́с** мәсьәләне бергәләп тикшереү

**СОВМЕ́СТНОСТЬ** *ж* бергәлек, уртаҡлыҡ; **совме́стность де́йствий** эштәрҙең уртаҡлығы

**СОВМЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое бергә, бергәләшкән, берләштерелгән, уртаҡ; **совме́стные уси́лия** уртаҡ тырышлыҡ; **совме́стное заседа́ние** берләштерелгән ултырыш

**СОВМЕЩА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* бергә (бер үк ваҡытта) алып барыу, бер үк ваҡытта башҡарыу (үтәү); **совмести́ть рабо́ту с учёбой** эш менән уҡыуҙы бер үк ваҡытта алып барыу **2.** *в ком-чём* (*одновременно содержать в себе*) бер үк ваҡытта булыу (үтәү), бергә ҡушылыу (һыйыу), берләшеү; **он совмести́л в себе́ писа́теля и учёного** ул бер үк ваҡытта яҙыусы ла, ғалим да **3.** *мат.* тура (тап) килтереп һалыу

**СОВМЕЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*совпадать*) бер үк ваҡытта булыу (эшләнеү, башҡарылыу), тура килеү **2.** *в ком-чём* (*соединяться в одном лице, предмете*) бер үк ваҡытта булыу, берләшеү, ҡушылыу **3.** *мат.* тура (тәңгәл) килтереп һалыныу **4.** *страд. от* **совмеща́ть**

**СОВМЕЩЕ́НИЕ** *с см.* **совмести́ть – совмеща́ть**, **совмести́ться – совмеща́ться**; **совмеще́ние профе́ссий** бер нисә профессияны бергә ҡушыу

**СОВМЕЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **совмести́ть 2.** *прил.* берләштерелгән, уртаҡ; **совмещённый гра́фик рабо́т** берләштерелгән эш графигы

**СОВО́К** *м* һоҫҡо

**СОВОКУПИ́ТЬ** *сов. что* берләштереү, йыйыу, йыйнау, беректереү

**СОВОКУПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *уст.* бергә булыу, бәйләнешеү **2.** енси мөнәсәбәттә булыу

**СОВОКУПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **совокупи́ть**

**СОВОКУПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **совокупи́ться 2.** *страд. от* **совокупля́ть**

**СОВОКУ́ПНОСТЬ** *ж* барлығы (йыйыны, барыһы) бергә; **совоку́пность фа́ктов** фактарҙың барыһы бергә

**СОВОКУ́ПНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* берҙәм, берләштерелгән, бергәләп (эшләнгән), дөйөм; **совоку́пный дохо́д** дөйөм килем

**СОВПАДА́ТЬ** *несов. см.* **совпа́сть**

**СОВПАДЕ́НИЕ** *с* **1.** (*одинаковость*) дөйөмлөк, уртаҡлыҡ, оҡшашлыҡ; **совпаде́ние мне́ний** фекерҙәр уртаҡлығы **2.** (*сочетание*) тап (тура) килеү(сәнлек), тәңгәллек; **совпаде́ние обстоя́тельств** хәл-ваҡиғаларҙың тап килеүе

**СОВПА́СТЬ** *сов.* **1.** (*произойти одновременно*) -да/-дә булыу, тура килеү; **э́то собы́тие совпа́ло с его́ прие́здом** был ваҡиға ул килгән ваҡытҡа тура килде **2.** (*оказаться одинаковым*) үҙ-ара тура (тап) килеү; **мне́ние их совпа́ло** уларҙың фекерҙәре тап килде **3.** *мат.* тәңгәл килеү

**СОВРАТИ́ТЕЛЬ** *м* и **СОВРАТИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж*; *книжн.* аҙҙырыусы, юлдан яҙҙырыусы

**СОВРАТИ́ТЬ** *сов. кого-что* аҙҙырыу, насар юлға баҫтырыу (төшөрөү)

**СОВРАТИ́ТЬСЯ** *сов.* аҙыу, насар юлға баҫыу (төшөү)

**СОВРА́ТЬ** *сов. см.* **врать** 1, 3

**СОВРАЩА́ТЬ** *несов. от* **соврати́ть**

**СОВРАЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **соврати́ться 2.** *страд. от* **совраща́ть**

**СОВРАЩЕ́НИЕ** *с см.* **соврати́ть – совраща́ть, соврати́ться – совраща́ться**; **совраще́ние малоле́тних** сабыйҙарҙы насар юлға баҫтырыу

**СОВРЕМЕ́ННИК** *м* и **СОВРЕМЕ́ННИЦА** *ж* замандаш, ҡорҙаш; **совреме́нники Салава́та Юла́ева** Салауат Юлаев замандаштары

**СОВРЕМЕ́ННО** *нареч.* заманса, заман талап иткәнсә; **ко́мната обста́влена совреме́нно** бүлмә заманса йыһазландырылған

**СОВРЕМЕ́ННОСТЬ** *ж* хәҙерге заман (осор); **связь исто́рии и совреме́нности** тарих менән хәҙерге осор бәйләнеше

**СОВРЕМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *кому-чему* (*относящийся к одному времени*) замандаш, бер осорҙа йәшәгән **2.** (*относящийся к настоящему времени*) хәҙерге, хәҙерге заман (осор) ...ы; **совреме́нная молодёжь** хәҙерге йәштәр; **совреме́нный башки́рский язы́к** хәҙерге башҡорт теле **3.** (*находящийся на уровне своего времени*) хәҙерге заман талаптарына тура килгән, хәҙерге заман ...ы; **совреме́нное обору́дование** хәҙерге заман ҡорамалдары **4.** актуаль, заман талабына ярашлы, мөһим; **те́ма иссле́дования совреме́нна** тикшеренеү темаһы заман талабына ярашлы

**СОВСЕ́М** *нареч.* **1.** (*совершенно*) бөтөнләй; **я совсе́м забы́ла** бөтөнләй онотҡанмын; **совсе́м но́вый костю́м** бөтөнләй яңы костюм **2.** (*с отрицанием “не”*) бик үк түгел, бик үк -ып/-еп етмәү (бөтмәү); **он не совсе́м здоро́в** бик үк сәләмәт түгел; **я не совсе́м понима́ю** бик үк аңлап етмәйем **3.** *разг.* (*навсегда*) бөтөнләйгә; **прие́хать совсе́м** бөтөнләйгә ҡайтыу **4.** *в знач. частицы* һис тә, бер ҙә; **совсе́м нет** һис тә юҡ

**СОВХО́З** *м* совхоз (*совет хужалығы*); **зерново́й совхо́з** игенселек совхозы; **свеклово́дческий совхо́з** сөгөлдөр үҫтереү совхозы

**СОВХО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое совхоз ...ы; **совхо́зные поля́** совхоз баҫыуҙары; **совхо́зное произво́дство** совхоз производствоһы

**СОГБЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *книжн.* (*сгорбленный – о человеке*) бөкрәйгән, көмрө; **согбе́нный стари́к** бөкрәйгән ҡарт **2.** (*согнувшийся под тяжестью*) бөгөлгән, һығылып төшкән **3.** *чем*; *перен.* (*подавленный*) аптыраған, баҙаған

**СОГЛА́СИЕ** *с* **1.** (*позволение*) ризалыҡ; **дать согла́сие** ризалыҡ биреү **2.** (*соглашение*) килешеү, уртаҡ фекергә килеү; **прийти́ к согла́сию** уртаҡ фекергә килеү **3.** (*гармония*) дуҫлыҡ, татыулыҡ, берҙәмлек; **в семье́ цари́т согла́сие** ғаиләлә татыулыҡ хөкөм һөрә

**СОГЛАСИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *юр.* килештереүсе, яраштырыусы; **согласи́тельная коми́ссия** килештереүсе комиссия

**СОГЛАСИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*привести в соответствие*) тап килтереү **2.** (*примирив, объединить*) килештереү **3.** (*склонить к чему-л.*) ризалаштырыу, күндереү

**СОГЛАСИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *на что* и *с неопр.* ризалашыу, риза булыу, ризалыҡ биреү (белдереү), күнеү; **согласи́ться на опера́цию** операцияға риза булыу **2.** *с кем-чем* и *без. доп.* ризалашыу, килешеү, фекергә ҡушылыу; **согласи́ться с мне́нием а́втора** автор фекере менән килешеү **3.** *на чём*; *разг.* (*договориться*) килешеү, һүҙ ҡуйышыу; **согласи́ться на том, что́бы встре́титься** осрашырға һүҙ ҡуйышыу

**СОГЛА́СНО** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* (*дружно*) татыу, дуҫ, берҙәм; **жить согла́сно** татыу йәшәү **2.** *предлог с дат. п.* (*соответственно*) буйынса; **согла́сно уста́ву** устав буйынса

**СОГЛА́СНЫЙ I,** -ая, -ое *лингв.* **1.** тартынҡы; **согла́сный звук** тартынҡы өн **2.** *в знач. сущ.* **согла́сный** *м* тартынҡы; **зво́нкие согла́сные** яңғырау тартынҡылар; **твёрдый согла́сный** ҡалын тартынҡы

**СОГЛА́СНЫЙ II,** -ая, -ое **1.** риза; **я согла́сен на все усло́вия** мин бөтә шарттарға ла риза **2.** (*дружный*) татыу, берҙәм; **согла́сная семья́** татыу ғаилә; **согла́сная рабо́та** берҙәм эш **3.** (*гармоничный*) ҡолаҡҡа ятышлы, матур яңғырашлы, аһәңле, төҙөк; **согла́сный напе́в** ҡолаҡҡа ятышлы көй

**СОГЛАСОВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **согласова́ть – согласова́ться** 1; **2.** *грам.* ярашыу; **согласова́ние подлежа́щего и сказу́емого** эйә менән хәбәрҙең ярашыуы

**СОГЛАСО́ВАННОСТЬ** *ж* килештереүсәнлек, берҙәмлек, ярашыусанлыҡ; **согласо́ванность де́йствий** эш-хәрәкәттең берҙәмлеге

**СОГЛАСО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **согласова́ть 2.** *прил.* килешеп (һөйләшеп) эшләнгән, берҙәм; **согласо́ванные реше́ния** килешеп эшләнгән ҡарар

**СОГЛАСОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*привести в соответствие*) яраштырыу, килешеү, тура килтереү; **согласова́ть пла́ны рабо́ты** эш пландарын килешеү **2.** (*выработать единое мнение*) бергәләп хәл итеү (һөйләшеү), уртаҡ фекергә килеү, ризалыҡ алыу; **согласова́ть вопро́с** мәсьәләне бергәләп хәл итеү **3.** *грам.* яраштырыу; **согласова́ть сказу́емое с подлежа́щим** хәбәр менән эйәне яраштырыу

**СОГЛАСОВА́ТЬСЯ 1.** *сов., несов.* ярашлы булыу, тура килеү; **но́вое постановле́ние согласу́ется с пре́жним** яңы ҡарар элеккеһенә тура килә **2.** *только несов.*; *грам.* ярашыу

**СОГЛАСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **согласова́ть**

**СОГЛАСО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **согласова́ться 2.** *страд. от* **согласо́вывать**

**СОГЛАША́ТЕЛЬ** *м* килешеүсе, килешеп ҡараусы, аумаҡай

**СОГЛАША́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое килешеүсәнлек ...ы, килешеп ҡараусанлыҡ ...ы, аумаҡайлыҡ ...ы; **соглаша́тельская поли́тика** килешеүсәнлек сәйәсәте

**СОГЛАША́ТЕЛЬСТВО** *с* килешеүсәнлек, килешеп ҡараусанлыҡ, аумаҡайлыҡ

**СОГЛАША́ТЬ** *несов. см.* **согласи́ть**

**СОГЛАША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **согласи́ться 2.** *страд. от* **соглаша́ть**

**СОГЛАШЕ́НИЕ** *с* **1.** (*взаимное согласие*) үҙ-ара килешеү **2.** (*договор*) килешеү; **междунаро́дные соглаше́ния** халыҡ-ара килешеүҙәр; **соглаше́ние о переми́рии** тыныслыҡ хаҡында килешеү

**СОГЛЯДА́ТАЙ** *м* шымсы, күҙәтсе

**СОГНА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*прогнать*) ҡыуыу, ҡыуып ебәреү (төшөрөү); **согна́ть му́ху** себенде ҡыуыу **2.** *что* (*удалить, уничтожить*) бөтөрөү, юҡҡа сығарыу, юҡ итеү; **согна́ть снег с поле́й** баҫыуҙарҙан ҡарҙы бөтөрөү **согна́ть весну́шки** һипкелдәрҙе юҡ итеү **3.** (*заставить сойтись*) (ҡыуып) бер урынға йыйыу (туплау); **согна́ть ста́до к ре́чке** көтөүҙе һыулауға ҡыуыу **4.** (*о сплаве чего-л.*) ҡыуғынлау, ҡыуыу ♦ **согна́ть вес** ауырлыҡты кәметеү, ябығыу (*махсус саралар ярҙамында*); **согна́ть семь пото́в** ҡара тиргә батырыу; **согна́ть сон** йоҡоһон асыу (ҡасырыу)

**СО́ГНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **согну́ть 2.** *прил.* (*сгорбленный*) бөкрө, бөкрәйгән, кәкрәйгән, кәкре, көмрө; **со́гнутый стари́к** бөкрәйгән ҡарт **3.** *прил.* бөкләнгән; **со́гнутый па́лец** бөкләнгән бармаҡ

**СОГНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* бөгөү, кәкрәйтеү; **согну́ть про́волку** сымды бөгөү **2.** (*наклонить*) эйеү, ауыштырыу; **согну́ть берёзу** ҡайынды эйеү **3.** (*свести под углом в суставе*) бөкләү; **согну́ть па́лец** бармаҡты бөкләү; **согну́ть но́ги** аяҡтарҙы бөкләү **4.** (*склонить*) бөкрәйтеү, көмрәйтеү; **согну́ть спи́ну** арҡаны бөкрәйтеү **5.** *перен.* (*сделать покорным*) бөгөү, ҡаҡшатыу, хәл-дарманды (көс-ҡеүәтте) алыу, бирештереү; **неуда́чи не согну́ли его́** уңышһыҙлыҡтар уны ҡаҡшатманы ♦ **согну́ть в бара́ний рог** *см.* **бара́ний**; **согну́ть в три поги́бели**: 1) ныҡ иңкәйтеү, бөгөү; 2) йәберләп (яфалап) буйһондороу, бик ныҡ ҡыҫыу

**СОГНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бөгөлөү, кәкрәйеү; **гвоздь согну́лся** сөй кәкрәйҙе; **уди́лище согну́лось** ҡармаҡ һабы бөгөлдө **2.** эйелеү, ауыш хәлгә килеү; **дере́вья согну́лись** ағастар эйелде **3.** бөкләнеү; **но́ги согну́лись** аяҡтар бөкләнде **4.** бөкрәйеү, көмрәйеү, бөксәйеү; **согну́ться в седле́** эйәрҙә бөксәйеп ултырыу; **стари́к согну́лся** ҡарт көмрәйгән **5.** *перен.* (*покориться чьей-л. силе*) баш эйеү, буйһоноу, бөгөлөп төшөү, еңелеү, бирешеү

**СОГРЕВА́НИЕ** *с см.* **согрева́ть – согрева́ться**

**СОГРЕВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йылыта торған; **согрева́тельный прибо́р** йылыта торған прибор **2.** *в знач. сущ.* **согрева́тельное** *с*; *разг.* йылытҡыс (*иҫерткес эсемлеккә ҡарата*)

**СОГРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **согре́ть**

**СОГРЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **согре́ться 2.** *страд. см.* **согрева́ть**

**СОГРЕВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **согрева́ть 2.** *прил.* йылыта торған; **согрева́ющий напи́ток** йылыта торған эсемлек; **согрева́ющий компре́сс** йылыта торған боҫлама

**СОГРЕ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** йылытыу, йылытып алыу; **согре́ть во́ду** һыу йылытыу; **согре́ть но́ги** аяҡтарҙы йылытыу **2.** *перен.* (*утешить, ободрить*) күңелен күтәреү, йыуатыу, тынысландырыу

**СОГРЕ́ТЬСЯ** *сов.* йылыныу; **вода́ согре́лась** һыу йылынды; **согре́ться ча́ем** сәй эсеп йылыныу

**СОГРЕШИ́ТЬ** *сов. см.* **греши́ть** 1

**СО́ДА** *ж* сода; **ча́йная со́да** аш (сәй) содаһы; **каусти́ческая со́да** кер содаһы, каустик сода

**СОДЕ́ЙСТВИЕ** *с* ярҙам, булышлыҡ; **при соде́йствии** ярҙамы (булышлығы) менән, ярҙамында, булышлығында

**СОДЕ́ЙСТВОВАТЬ** *сов., несов. кому-чему* ярҙам итеү (күрһәтеү), булышлыҡ итеү (күрһәтеү), булышыу

**СОДЕРЖА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **содержа́ть** 1—4; **сре́дства на содержа́ние семьи́** ғаиләне аҫрау өсөн (кәрәк) аҡса **2.** хеҙмәт (эш) хаҡы, аҡса; **о́тпуск без сохране́ния содержа́ния** эш хаҡы һаҡланмаған ял **3.** эстәлек, йөкмәтке; **содержа́ние кни́ги** китаптың эстәлеге **4.** (*количество вещества в чём-л.*) күләм, миҡдар; **содержа́ние жи́ра в молоке́** һөттөң ҡуйылығы; **содержа́ние вла́ги в атмосфе́ре** атмосферала дым күләме **5.** *филос.* йөкмәтке; **фо́рма и содержа́ние** форма һәм йөкмәтке **6.** (*духовный мир человека*) рухи байлыҡ; **вну́треннее содержа́ние челове́ка** кешенең рухи байлығы

**СОДЕРЖА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* йөкмәткелелек, эстәлеклелек; **содержа́тельность рома́на** романдың эстәлеклелеге

**СОДЕРЖА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йөкмәткеле, эстәлекле; **содержа́тельная кни́га** йөкмәткеле китап

**СОДЕРЖА́ТЬ** *несов. что* **1.** аҫрау, ҡарау, бағыу, тәьмин итеү; **содержа́ть семью́** ғаиләне аҫрау; **содержа́ть роди́телей** ата-әсәне бағыу **2.** (үҙ ҡулыңда) аҫрау, биләү, тотоу (*мал-тыуарға, ҡош-ҡортҡа ҡарата*); **содержа́ть лошаде́й в коню́шне** аттарҙы атлыҡсала тотоу **3.** (*держать где-л.*) бикләп (ябып) тотоу, ултыртыу, ҡулға (һаҡ аҫтына) алыу **4.** һаҡлау, тотоу; **содержа́ть ко́мнату в чистоте́** бүлмәне таҙа тотоу **5.** *что* (*заключать в себе*) бар; **го́рные поро́ды соде́ржат желе́зо** тау тоҡомдарында тимер бар

**СОДЕРЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** тәьмин итеү (ителеү), аҫралыу, ҡаралыу, бағылыу; **дом о́тдыха соде́ржится за счёт заво́да** ял йорто завод иҫәбенә тәьмин ителә **2.** тотолоу, аҫралыу; **кабине́т соде́ржится в чистоте́** кабинет таҙа тотола **3.** бар булыу; **в свёкле соде́ржится мно́го са́хара** сөгөлдөрҙә шәкәр күп була

**СОДЕРЖИ́МОЕ** *с* эсендәге (эсендә булған) нәмә, эсендәгеһе; **содержи́мое я́щика** йәшник эсендәге нәмә

**СО́ДОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** сода ...ы; **со́довый заво́д** сода заводы **2.** *в знач. сущ.* **со́довая** *ж см.* **со́довая вода́** ♦ **со́довая вода́** содалы һыу

**СОДОКЛА́Д** *м* өҫтәмә доклад

**СОДОКЛА́ДЧИК** *м* өҫтәмә докладсы

**СОДО́М** *м* **1.** *разг.* ығы-зығы, шау-шыу, ғауға; **подня́ть содо́м** ғауға ҡуптарыу **2.** (*разврат*) аҙғынлыҡ, боҙоҡлоҡ

**СОДРА́ТЬ** *сов. что* **1.** һуйыу, һыҙырып (тунап) алыу, ҡуптарыу; **содра́ть шку́ру с уби́того медве́дя** үлтерелгән айыуҙың тиреһен тунап алыу; **содра́ть с берёзы бересту́** ҡайындың туҙын һыҙырып алыу **2.** *разг.* (*ссадить кожу*) һыҙыртыу, сыйҙырыу, тырнатыу; **содра́ть ко́жу на руке́** ҡул тиреһен һыҙыртыу **3.** *разг.* (*снять*) тартып төшөрөү (алыу) **4.** *перен.* и *без доп.*; *прост.* (*взять за что-л. непомерно дорого*) ҡыйбат алыу, талау, тунау; **содра́ть втри́дорога** өс тапҡыр ҡыйбат (хаҡ) алыу ♦ **содра́ть шку́ру** ете ҡат тиреһен тунау (*бик ҡиммәт алыу*)

**СОДРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*о коже, кожуре*) һыҙырылыу, ҡуптарылыу, туналыу; **ко́жа содрала́сь** тиреһе һыҙырылды

**СОДРОГА́ТЬ** *несов. что* дерелдәтеү, ҡалтыратыу, һелкетеү; **вы́стрелы содрога́ли зда́ния** атыу тауыштары йорттарҙы һелкетте

**СОДРОГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** дерелдәү, ҡалтырау, тетрәү, һелкенеү; **от раска́тов гро́ма содрога́лась земля́** күк күкрәүҙән ер һелкенде **2.** (*приходить в волнение от боли, ужаса и т.п.*) ҡалтырау, ҡурҡып (ҡалтыранып) китеү, ҡалтыраныу; **содрога́ться всем те́лом** тотош тән ҡалтырау

**СОДРОГНУ́ТЬ** *сов. см.* **содрога́ть**

**СОДРОГНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **содрога́ться**

**СОДРУ́ЖЕСТВО** *с* **1.** дуҫлыҡ, берҙәмлек; **тво́рческое содру́жество** ижади берҙәмлек **2.** (*объединение*) берләшмә, йәмғиәт; **литерату́рное содру́жество** әҙәби берләшмә

**СО́ЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** соя ...ы; **со́евые бобы́** соя борсағы; **со́евое ма́сло** соя майы **2.** соялы; **со́евые конфе́ты** соялы кәнфит

**СОЕДИНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **соедини́ть — соединя́ть**, **соедини́ться — соединя́ться**; **соедине́ние электри́ческих проводо́в** электр сымдарының тоташыуы; **соедине́ние тео́рии и пра́ктики** теория менән практиканың берләшеүе **2.** (*место*) ҡушылма, ялғанма, ялғанған (ҡушылған) урын, ялғанған (ҡушылған, тоташтырылған, беркетелгән) ер; **обры́в про́вода на соедине́нии** сымдың ялғанған ерҙән өҙөлөүе **3.** *воен.* берләшмә, соединение; **та́нковые соедине́ния** танкылар берләшмәһе **4.** *хим.* берләшмә; **хими́ческое соедине́ние** химик берләшмә; **органи́ческое соедине́ние** органик берләшмә

**СОЕДИНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **соедини́ть 2.** *прил.* берләшкән, ҡушылған, ҡушма; **соединённые си́лы** берләшкән көстәр

**СОЕДИНИ́ТЕЛЬ** *м* тоташтырғыс, берләштергес; **соедини́тель проводо́в** сымдарҙы тоташтырғыс

**СОЕДИНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** берләштергес, тоташтырғыс, ҡушыусы; **соедини́тельная ткань** *биол.* тоташтырғыс туҡыма **2.** *лингв.* йыйыу ...ы; **соедини́тельные сою́зы** йыйыу теркәүестәре

**СОЕДИНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* бергә ҡушыу, берләштереү; **соедини́ть две гру́ппы** ике төркөмдө бергә ҡушыу; **соедини́ть си́лы** көстәрҙе берләштереү **2.** *что* (*скрепить*) теркәү, тоташтырыу, беркетеү, ялғау, тоташтырып (теркәп, беркетеп, ялғап) ҡуйыу; **соедини́ть провода́** сымдарҙы ялғап ҡуйыу **3.** *кого-что* бәйләү; **соедини́ть бра́ком** никах менән бәйләү **4.** (*установить сообщение*) тоташтырыу; **соедини́ть с го́родом** ҡала менән тоташтырыу **5.** *что* (*сочетать одно с другим*) берләштереү, сиратлаштырыу, сиратлап алмаштырыу; **соедини́ть труд с о́тдыхом** эш менән ялды сиратлап алмаштырыу; **соедини́ть тео́рию с пра́ктикой** теория менән практиканы берләштереү **6.** *что* (*смешать*) ҡушыу, бергә ҡушыу; **соедини́ть кра́ски** буяуҙарҙы бергә ҡушыу

**СОЕДИНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡушылыу, берләшеү; **рабо́чие соедини́лись** эшселәр берләштеләр **2.** ялғаныу, тоташыу; **провода́ соедини́лись** сымдар тоташҡан **3.** бәйләнеү; **соедини́ться бра́ком** никах менән бәйләнеү **4.** (*установить связь*) һөйләшеү, хәбәрләшеү, элемтә (бәйләнеш) тотоу; **соедини́ться по телефо́ну** телефон аша бәйләнеш тотоу **5.** (*совместиться*) берегеү, бергә килеү (тупланыу), берләшеү; **в ней соедини́лись красота́ и ум** унда аҡыл менән матурлыҡ бергә килгән **6.** ҡушылыу; **водоро́д соедини́лся с кислоро́дом** *хим.* водород кислород менән ҡушылған

**СОЕДИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **соедини́ть**

**СОЕДИНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **соедини́ться** **2.** *страд. от* **соединя́ть**

**СОЖАЛЕ́НИЕ** *с* **1.** үкенес, үкенеү (тойғоһо); **и́скреннее сожале́ние** ысын күңелдән булған үкенеү **2.** (*сочувствие к кому-л.*) ҡыҙғаныу (йәлләү) тойғоһо, әрнеү; **смотре́ть с сожале́нием** йәлләп ҡарау ♦ **к вели́кому (глубо́кому, кра́йнему) сожале́нию** *в знач. вводн. сл.* үкенескә (ҡыҙғаныска) ҡаршы

**СОЖАЛЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *о чём* үкенеү, ҡыҙғаныу; **сожале́ю, что не могу́ помо́чь вам** һеҙгә ярҙам итә алмауыма үкенәм **2.** (*испытывать сожаление о ком-чём-л.*) йәлләү

**СОЖЖЕ́НИЕ** *с см.* **сжечь** 1; **сожже́ние и́звести** эзбиз яндырыу

**СОЖИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** (*по комнате, квартире*) бергә тороусы (йәшәүсе), өйҙәш, бүлмәләш **2.** *разг.* (*любовник*) һөйәр **3.** (*муж*) ир

**СОЖИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* **1.** *см.* **сожи́тель** 1; **2.** (*любовница*) һөйәркә **3.** (*жена*) ҡатын, бисә

**СОЖИ́ТЕЛЬСТВО** *с* (*совместная жизнь*) бергә тороу (йәшәү)

**СОЖИ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов.* (*жить совместно*) бергә тороу (йәшәү)

**СОЖРА́ТЬ** *сов.*; *прост.*, *пренебр.* ашау, тығыныу

**СОЗВА́НИВАТЬСЯ** *несов. см.* **созвони́ться**

**СОЗВА́ТЬ** *сов. кого-что* саҡырыу, йыйыу; **созва́ть госте́й** ҡунаҡ саҡырыу; **созва́ть совеща́ние** кәңәшмә йыйыу

**СОЗВЕ́ЗДИЕ** *с* **1.** йондоҙлоҡ; **созве́здие Близнецо́в** Игеҙәктәр йондоҙлоғо; **созве́здие Большо́й Медве́дицы** Оло Етегән йондоҙлоғо **2.** *перен.* йондоҙлоҡ, йондоҙҙар, исемдәр; **созве́здие имён** шәхестәр исемлеге

**СОЗВОНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* телефондан (телефон аша) һөйләшеү, шылтыратыу, телефондан (телефон аша) һөйләшеп килешеү

**СОЗВУ́ЧИЕ** *с* **1.** *муз.* аһәң (*килешле, яғымлы, матур көй*); **мелоди́чное созву́чие** моңло аһәң **2.** *лит.* рифма, аһәңлелек; **созву́чие стиха́** шиғырҙың аһәңлелеге **3.** *перен.* оҡшашлыҡ, ярашлыҡ, оҡшаш (ярашлы) булыу; **созву́чие с совреме́нностью** заманға ярашлы булыу

**СОЗВУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аһәңле, матур яңғырашлы; **созву́чные акко́рды** аһәңле аккордтар **2.** *перен.* оҡшаш, ауаздаш, аһәңдәш; **рома́н, созву́чный эпо́хе** заманға ауаздаш роман

**СОЗДАВА́ТЬ** *несов. см.* **созда́ть**

**СОЗДАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **созда́ться** **2.** *страд. от* **создава́ть**

**СОЗДА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **созда́ть** 1, 4; **созда́ние нау́чной тео́рии** ғилми теория барлыҡҡа килтереү **2.** (*произведение, творение*) ижад, хеҙмәт, әҫәр; **созда́ния башки́рских худо́жников** башҡорт рәссамдарының ижады **3.** (*живое существо — о человеке*) зат, кеше; (*о животном*) йән эйәһе; **ми́лое созда́ние** мөләйем зат

**СОЗДА́ТЕЛЬ** *м* **1.** (*творец*) ижад итеүсе, төҙөүсе, ойоштороусы, тыуҙырыусы, яратыусы, барлыҡҡа килтереүсе; **созда́тель эпопе́и** эпопея тыуҙырыусы **2.** *рел.* (*Бог*) Хоҙай, Алла

**СОЗДА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** тыуҙырыу, ижад итеү; **созда́ть поэ́му** поэма ижад итеү **2.** (*стать причиной чего-л.*) булдырыу, барлыҡҡа килтереү, яратылыу, тыуҙырыу, яһау; **труд со́здал челове́ка** хеҙмәт кешене барлыҡҡа килтергән **3.** (*обеспечить что-л.*) булдырыу, тыуҙырыу, яһау; **созда́ть усло́вия** шарт тыуҙырыу **4.** (*организовать*) төҙөү, ойоштороу, нигеҙләү; **созда́ть а́рмию** армия төҙөү; **созда́ть спорти́вные гру́ппы** спорт төркөмдәре ойоштороу

**СОЗДА́ТЬСЯ** *сов.* тыуыу, килеп тыуыу, барлыҡҡа килеү, яһалыу, яралтыу, төҙөлөү, ижад ителеү; **созда́лся но́вый коллекти́в** яңы коллектив барлыҡҡа килде; **создало́сь сло́жное положе́ние** ҡатмарлы хәл килеп тыуҙы

**СОЗЕРЦА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **созерца́ть**; **созерца́ние небе́сных тел** күк есемдәрен күҙәтеү **2.** (*самоуглублённость*) хыял, хыялға бирелеү (сумыу) **3.** *филос.* һиҙеү, күреү, ишетеү, тойоу

**СОЗЕРЦА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* **1.** (*характерный для созерцания*) күҙәтеүсән; **созерца́тельный вид** күҙәтеүсән ҡиәфәт **2.** (*склонный к самосозерцанию*) хыялый, хыялға бирелеүсән; **созерца́тельная нату́ра** хыялый тәбиғәт

**СОЗЕРЦА́ТЬ** *несов. кого-что*; *книжн.* **1.** күҙәтеү, ентекләп (иғтибар менән) күҙәтеү; **созерца́ть приро́ду** тәбиғәтте күҙәтеү **2.** (*мысленно представлять*) күҙаллау (*уйҙа, хыялда*)

**СОЗИДА́НИЕ** *с*; *высок. см.* **созида́ть**; **проце́сс созида́ния** ижад итеү барышы; **па́фос созида́ния** ижад итеү дәрте

**СОЗИДА́ТЕЛЬ** *м*; *высок.* барлыҡҡа килтереүсе, ижад итеүсе, тыуҙырыусы; **наро́д — созида́тель духо́вного бога́тства** халыҡ — рухи байлыҡ тыуҙырыусы

**СОЗИДА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *высок.* ижади; **созида́тельный труд** ижади хеҙмәт

**СОЗИДА́ТЬ** *несов. кого-что*; *высок.* барлыҡҡа килтереү, булдырыу, ижад итеү, төҙөү, тыуҙырыу

**СОЗИДА́ТЬСЯ** *несов.*; *высок.* **1.** барлыҡҡа килеү, тыуыу, яһалыу, төҙөлөү, ижад ителеү; **созида́лся идеа́льный о́браз** идеаль образ барлыҡҡа килде **2.** *страд. от* **созида́ть**

**СОЗНАВА́ТЬ** *несов. что* **1.** таныу, аңлау, төшөнөү; **сознава́ть опа́сность** ҡурҡыныс барлығын аңлау; **сознава́ть свою́ вину́** үҙ ғәйебеңде таныу **2.** (*обладать сознанием, воспринимать сознательно*) асылына (мәғәнәһенә) төшөнөү, аңлау, танып (аңлап) белеү (өйрәнеү); **ребёнок сознаёт окружа́ющее** бала тирә-йүнде танып белә

**СОЗНАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *в чём* и *без доп.* таныу, йәшермәү, дөрөҫөн әйтеп (һөйләп) биреү; **сознава́ться в свое́й вине́** үҙ ғәйебеңде таныу **2.** *страд. от* **сознава́ть**

**СОЗНА́НИЕ** *с* **1.** аң, һуш, иҫ; **потеря́ть созна́ние** аңды юғалтыу, һуштан яҙыу; **быть без созна́ния** һушһыҙ булыу **2.** *филос.* аң; **бытие́ определя́ет созна́ние** аң йәшәйеш менән билдәләнә; **обще́ственное созна́ние** ижтимағи аң **3.** аңлау, төшөнөү, белеп тороу; **созна́ние своего́ до́лга** үҙ бурысыңды аңлау; **созна́ние свое́й правоты́** үҙеңдең хаҡлығыңды белеп тороу

**СОЗНА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** аңлылыҡ; **полити́ческая созна́тельность рабо́чих** эшселәрҙең сәйәси аңлылығы **2.** белә тороп, аңлы рәүештә (эшләнеү); **созна́тельность де́йствий** аңлы рәүештә эшләү **3.** аң; **рабо́тать с созна́тельностью** аң менән эшләү

**СОЗНА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аңлы, аңы булған, зиһенле, зиһене булған, аңлаған; **созна́тельный учени́к** аңлы уҡыусы; **созна́тельное отноше́ние к учёбе** уҡыуға аңлы мөнәсәбәт **2.** (*преднамеренный*) күрәләтә (белә тороп, аңлы рәүештә) эшләнгән; **созна́тельный обма́н** күрәләтә эшләнгән алдаҡ

**СОЗНА́ТЬ** *сов. см.* **сознава́ть** 1

**СОЗНА́ТЬСЯ** *сов. см.* **сознава́ться** 1

**СОЗРЕВА́НИЕ** *с см.* **созрева́ть**; **созрева́ние плодо́в** емештәрҙең өлгөрөүе; **духо́вное созрева́ние** рухи яҡтан өлгөрөү

**СОЗРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **созре́ть**

**СОЗРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** бешеү, өлгөрөү, етеү; **пшени́ца созре́ла** бойҙай өлгөргән **2.** (*о человеке*) буйға етеү, балиғ булыу, йәше етеү; **ю́ноша уже́ созре́л** егет балиғ булған инде **3.** *перен.* (*сложиться*) өлгөрөү, әҙер булып (формалашып) етеү; **реше́ние созре́ло** ҡарар өлгөрҙө **4.** *спец.* өлгөрөү, (файҙаланырға) әҙер булыу; **вино́ созре́ло** шарап өлгөргән

**СОЗЫ́В** *м см.* **созва́ть** – **созыва́ть**; **созы́в съе́зда писа́телей** яҙыусылар съезын саҡырыу

**СОЗЫВА́ТЬ** *несов. см.* **созва́ть**

**СОЗЫВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **созыва́ть**

**СОИЗВОЛЕ́НИЕ** *с*; *книжн.*, *уст.* рөхсәт, ризалыҡ; **с ва́шего соизволе́ния** һеҙҙең рөхсәтегеҙ менән

**СОИЗВО́ЛИТЬ** *сов. с неопр.*; *книжн.*, *уст.* теләү, теләк белдереү, риза булыу, рәхим итеү; **он соизво́лил прийти́** ул рәхим итеп килде

**СОИЗВОЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **соизво́лить**

**СОИЗМЕРЕ́НИЕ** *с см.* **соизме́рить** – **соизмеря́ть**

**СОИЗМЕРИ́МОСТЬ** *ж* **1.** үлсәнмәлек; **соизмери́мость величи́н** дәүмәлдәрҙең үлсәнмәлеге **2.** сағыштырмалылыҡ; **соизмери́мость поня́тий** төшөнсәләрҙең сағыштырмалылығы

**СОИЗМЕРИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** үлсәнмәле; **соизмери́мые величи́ны** үлсәнмәле дәүмәлдәр **2.** сағыштырмалы; **соизмери́мые поня́тия** сағыштырмалы төшөнсәләр

**СОИЗМЕ́РИТЬ** *сов. что* үлсәп ҡарау, сағыштырыу; **соизме́рить ви́ды труда́** хеҙмәт төрҙәрен сағыштырыу

**СОИЗМЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **соизме́рить**

**СОИЗМЕРЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **соизмеря́ть**

**СОИМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* исемдәш

**СОИСКА́НИЕ** *с* дәғүә итеү; **соиска́ние учёной сте́пени** ғилми дәрәжәгә дәғүә итеү

**СОИСКА́ТЕЛЬ** *м* и **СОИСКА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* дәғүә итеүсе, конкурста ҡатнашыусы; **соиска́тель сте́пени до́ктора нау́к** фән докторы дәрәжәһенә дәғүә итеүсе; **соиска́тель пре́мии** премияға дәғүә итеүсе

**СО́ЙКА** *ж* бараба, суҡ турғай

**СОЙТИ́** *сов.* **1.** *с чего* төшөү; **сойти́ с го́ры** тауҙан төшөү; **сойти́ с ло́шади** аттан төшөү **2.** *на что*; *перен.* (*спуститься*) төшөү, солғап алыу; **на зе́млю сошла́ ночь** ер өҫтөнә ҡараңғы төштө **3.** *с чего* (*соскочить при движении*) сығыу, төшөү; **по́езд сошёл с ре́льсов** поезд рельстан сыҡҡан **4.** *с чего* тайпылыу, ситкә тайшаныу, ситкә сығыу (китеү); **сойти́ с тропи́нки** һуҡмаҡтан тайпылыу; **сойти́ с доро́ги** юлдан ситкә сығыу **5.** *с чего* бөтөү, юҡ булыу, юғалыу; **снег сошёл с поле́й** баҫыуҙарҙа ҡар бөткән **6.** *с чего* и *без доп.* һыҙырылып (ҡубып) төшөү, төшөү; **со стены́ сошла́ кра́ска** стенанан буяу ҡубып төшкән; **с па́льца сошла́ ко́жа** бармаҡтың тиреһе һыҙырылып төшкән **7.** ҡайтыу, кәмеү, әҙәйеү; **вода́ сошла́** һыу ҡайтҡан **8.** *за кого-что* ярау, торорлоҡ (ярарлыҡ) булыу, тор; **сойти́ за молодо́го** йәштәргә торорлоҡ ♦ **сойде́т (и так)** былай ҙа ярар; **сойти́ на нет** юҡҡа сығыу; **сойти́ с рук** язаһыҙ ҡалыу (*берәй ярамаған эш тураһында*); **сойти́ со сце́ны** *см.* **сце́на**; **сойти́ в моги́лу** ҡәбергә (гүргә) кереү; **сойти́ с ума́** аҡылдан яҙыу (шашыу); **сойти́ с диста́нции** *см.* **диста́нция**

**СОЙТИ́СЬ** *сов.* **1.** (*встретиться*) осрашыу, тап булышыу; **сойти́сь на доро́ге** юлда осрашыу; **сошли́сь два дру́га** ике дуҫ тап булышты **2.** (*собраться*) йыйылышыу, йыйылыу; **госте́й сошло́сь мно́го** ҡунаҡтар күп йыйылды **3.** (*сдру-*

*житься*) дуҫлашыу, дуҫ булып китеү (булыу); **мы сошли́сь давно́** беҙ күптән дуҫлаштыҡ **4.** *разг.* (*вступить в сожительство*) ҡауышыу, ҡушылыу, бергә тороу **5.** (*совпасть*) *в чём, чем* тап (тура) килеү, килешеү; **не сойти́сь хара́ктерами** холоҡтары тура килмәү; **сойти́сь в цене́** хаҡына килешеү **6.** *разг.* (*оказаться впору*) етеү, кәрәк саҡлы булыу; **реме́нь не сошёлся** ҡайыш етмәй ♦ **свет (не) кли́ном сошёлся** *см.* **клин**

**СОК** *м* һут, һыу; **берёзовый сок** ҡайын һыуы; **желу́дочный сок** ашҡаҙан һуты; **я́блочный сок** алма һуты ♦ **в са́мом (по́лном) соку́** көслө, йәшнәгән (япып торған, иң ғәйрәтле, таҙа) сағы; **выжима́ть все со́ки** барлыҡ хәлен алыу, арманһыҙ итеү; **вари́ться в со́бственном соку́** *см.* **вари́ться**; **соса́ть сок (со́ки)** ҡанын һурыу

**СОКОВЫЖИМА́ЛКА** *ж* һут һыҡҡыс

**СО́КОВЫЙ** и *спец.* **СОКОВО́Й,** -ая, -ое һут ...ы, һут сығара торған; **со́ковый заво́д** һут сығара торған завод

**СО́КОЛ** *м*; *в разн. знач.* ыласын; **ло́вчий со́кол** һунар ыласыны; **со́колы страны́** *высок.* ил ыласындары ♦ **гол как соко́л** *соотв.* ауыҙын асһа, үпкәһе күренә; **смотре́ть со́колом** ғәйрәтле (күркәм, ғорур) ҡиәфәттә ҡарап тороу

**СОКОЛЁНОК** *м* ыласын балаһы

**СОКОЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** ыласын ...ы, ыласындыҡы һымаҡ; **соколи́ное гнездо́** ыласын ояһы **2.** ыласын ярҙамында (менән); **соколи́ная охо́та** ыласын менән һунар итеү **3.** *перен.* (*как у сокола*) ыласындай, ыласын кеүек, ыласындыҡы һымаҡ, ғорур, ғәйрәтле; **соколи́ный взгляд** ғорур ҡараш; **соколи́ный глаз** ыласындыҡы һымаҡ күҙ **4.** *в знач. сущ.* **соколи́ные** *мн.*; *зоол.* ыласын һымаҡтар

**СОКОЛИ́ХА** *ж*; *разг.* инә ыласын

**СОКО́ЛЬНИК** *м* ыласынсы, һунар ыласындарын ҡараусы

**СОКРАТИ́МОСТЬ** *ж* **1.** *мат.* ҡыҫҡарыусанлыҡ; **сократи́мость чи́сел** һандарҙың ҡыҫҡарыусанлығы **2.** *физиол.* тартылыусанлыҡ; **сократи́мость мы́шечной тка́ни** мускул туҡымаларының тартылыусанлығы

**СОКРАТИ́МЫЙ,** -ая, -ое *мат.* ҡыҫҡартырлыҡ, ҡыҫҡартылыусы, ҡыҫҡарыусан, ҡыҫҡартып була торған; **сократи́мые чи́сла** ҡыҫҡарыусан һандар; **сократи́мая дробь** ҡыҫҡарыусан кәсер

**СОКРАТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*сделать коротким*) ҡыҫҡартыу; **сократи́ть путь** юлды ҡыҫҡартыу; **сократи́ть рабо́чий день** эш көнөн ҡыҫҡартыу; **сократи́ть статью́** мәҡәләне ҡыҫҡартыу **2.** (*уменьшить, ограничить в объёме, количестве и т.п.*) кәметеү, әҙәйтеү (аҙайтыу); **сократи́ть расхо́ды** сығымдарҙы кәметеү **3.** *разг.* (*уволить с работы*) эштән сығарыу (бушатыу), ҡыҫҡартыу; **сократи́ть со слу́жбы** эштән бушатыу **4.** *мат.* ҡыҫҡартыу (*математик мөнәсәбәттең ике өлөшөн дә берәй һанға бүлеп, аҙ һандарҙы сағылдырыу*); **сократи́ть дробь** кәсерҙе ҡыҫҡартыу

**СОКРАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать коротким*) ҡыҫҡарыу; **расстоя́ние сократи́лось** ара ҡыҫҡарҙы; **дни сократи́лись** көндәр ҡыҫҡарҙы **2.** кәмеү, аҙайыу (әҙәйеү); **расхо́ды сократи́лись** сығымдар кәмене **3.** *физиол.* тартылыу, ҡыҫылыу; **мы́шцы сократи́лись** мускулдар тартылды **4.** *мат.* ҡыҫҡарыу; **дробь сократи́тся на два** кәсер икегә ҡыҫҡара

**СОКРАЩА́ТЬ** *несов. см.* **сократи́ть**

**СОКРАЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сократи́ться** **2.** *страд. от* **сокраща́ть**

**СОКРАЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сократи́ть — сокраща́ть, сократи́ться — сокраща́ться; сокраще́ние пути́** юлдың ҡыҫҡарыуы; **сокраще́ние вооруже́ний** ҡоралланыуҙың кәмеүе; **сокраще́ние мышц** мускулдарҙың тартылыуы; **сокраще́ние дро́би** кәсерҙең ҡыҫҡарыуы **2.** ҡыҫҡартма; **спи́сок усло́вных сокраще́ний** шартлы ҡыҫҡартмалар исемлеге **3.** *разг.* (*уменьшение штата*) ҡыҫҡартыу, хеҙмәткәрҙәр һанын кәметеү

**СОКРАЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сократи́ть** **2.** *прил.*; *в разн. знач.* ҡыҫҡарған, ҡыҫҡартылған; **сокращённое сло́во** ҡыҫҡартылған һүҙ; **сокращённый рабо́чий день** ҡыҫҡартылған эш көнө

**СОКРОВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*тайный*) йәшерен, серле; **сокрове́нные мечты́** йәшерен хыялдар **2.** (*заветный*) күңел (йөрәк) түрендәге, ҡәҙерле; **сокрове́нные та́йны** күңел түрендәге серҙәр

**СОКРО́ВИЩЕ** *с* **1.** (*драгоценности*) хазина, байлыҡ, мал **2.** байлыҡ; **приро́дные сокро́вища** тәбиғәт байлығы **3.** *обычно мн.* **сокро́вища** байлыҡ, хазина; **духо́вные сокро́вища** рухи хазина; **сокро́вища иску́сства** сәнғәт хазинаһы **4.** *разг.* (*ласковое обращение*) ҡәҙерлем ♦ **ни за каки́е сокро́вища** һис тә, бер нисек тә

**СОКРО́ВИЩНИЦА** *ж* **1.** (*место*) ҡаҙна **2.** (*совокупность культурных, духовных ценностей*) хазина, байлыҡ; **сокро́вищница зна́ний** белем хазинаһы

**СОКРУША́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** емереү, ҡыйратыу, ватыу, юҡ итеү; **сокруша́ть ста́рые забо́ры** иҫке ҡоймаларҙы емереү **2.** *перен.* (*уничтожать, ниспровергать*) тар-мар итеү, ҡыйратыу; **сокруша́ть проти́вника** дошманды тар-мар итеү **3.** (*сильно огорчать*) ҡайғыға һалыу, көйәләндереү, хәсрәткә төшөрөү (һалыу)

**СОКРУША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*сильно огорчаться, печалиться*) ҡайғырыу, көйәләнеү, ҡайғыға (хәсрәткә) төшөү, яныу, көйөү **2.** *страд. от* **сокруша́ть** 1, 2

**СОКРУШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сокруша́ть – сокруши́ть** 1, 2; **сокруше́ние врага́** дошманды тар-мар итеү **2.** (*сильное огорчение*) ҡаты ҡайғы (хәсрәт), көйөнөс, көйөк, ныҡ бошоноу (борсолоу, хәүефләнеү); **с сокруше́нием гляде́ть** ныҡ бошоноп ҡарау

**СОКРУШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое емергес, тармар (юҡ) итә торған; **сокруши́тельная си́ла** емергес көс

**СОКРУШИ́ТЬ** *сов. см.* **сокруша́ть, круши́ть**

**СОКРЫ́ТИЕ** *с*; *офиц.-дел.* йәшереү, йәшереп ҡалыу; **сокры́тие престу́пника** енәйәтсене йәшереү

**СОЛГА́ТЬ** *сов. см.* **лгать**

**СОЛДА́Т** *м* һалдат; **взвод солда́т** һалдаттар взводы

**СОЛДА́ТКА** *ж* һалдат ҡатыны

**СОЛДА́ТСКИЙ,** -ая, -ое һалдат ...ы; **солда́тская шине́ль** һалдат шинеле

**СОЛДА́ТСТВО** *с* **1.** һалдат хеҙмәте **2.** *собир.* һалдаттар

**СОЛДА́ТЧИНА** *ж*; *уст., прост.* һалдат хеҙмәте

**СОЛДАФО́Н** *м*; *разг., пренебр.* солдафон (*тупаҫ, әҙәпһеҙ хәрби кешегә ҡарата*)

**СОЛЕВА́Р** *м* тоҙ ҡайнатыусы

**СОЛЕВАРЕ́НИЕ** *с* тоҙ ҡайнатыу

**СОЛЕВА́РЕННЫЙ** и **СОЛЕВА́РНЫЙ,** -ая, -ое тоҙ ҡайнатыу ...ы; **солева́рный заво́д** тоҙ ҡайнатыу заводы

**СОЛЕВА́РНЯ** *ж* тоҙ ҡайнатыу предприятиеһы, тоҙ сығарыу (табыу) урыны

**СОЛЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** тоҙ ...ы; **солевы́е раство́ры** тоҙ иретмәһе **2.** *см.* **солева́ренный**

**СОЛЕВЫНО́СЛИВЫЙ,** -ая, -ое *бот.* тоҙға сыҙамлы (*үҫемлектәргә ҡарата*)

**СОЛЕДОБЫВА́НИЕ** *с* тоҙ сығарыу

**СОЛЕДОБЫВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** тоҙ сыға торған; **соледобыва́ющий райо́н** тоҙ сыға торған район **2.** тоҙ сығара торған; **соледобыва́ющий снаря́д** тоҙ сығара торған ҡорамал

**СОЛЕЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *бот.* тоҙ яратыусан (*үҫемлектәргә ҡарата*)

**СОЛЕМЕ́Р** *м* солемер (*һыуҙағы йәки һыу боҫондағы тоҙ миҡдарын үлсәй торған ҡорамал*)

**СОЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **соли́ть** 1, 2; **соле́ние огурцо́в** ҡыяр тоҙлау **2.** *разг.* (*продукт*) тоҙланған йәшелсәләр

**СОЛЁНОСТЬ** *ж* тоҙлолоҡ; **солёность воды́** һыуҙың тоҙлолоғо

**СОЛЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тоҙло, тоҙ ҡатнаш; **солёная вода́** тоҙло һыу; **солёное о́зеро** тоҙло күл **2.** тоҙо саманан артыҡ, тоҙо әсе, тоҙло; **солёный суп** тоҙо әсе аш **3.** тоҙ һибелгән, тоҙ һибеп әҙерләнгән, тоҙланған, тоҙло; **солёные огурцы́** тоҙланған ҡыяр; **солёная ры́ба** тоҙло балыҡ **4.** *перен.* сәнскеле, үткер, әсе, уҫал; **солёный анекдо́т** әсе көләмәс; **солёное сло́во** сәнскеле һүҙ

**СОЛЕСТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое *бот.* тоҙға сыҙамлы (*үҫемлектәр*)

**СОЛИДАРИЗА́ЦИЯ** *ж*; *книжн. см.* **солидаризи́роваться**

**СОЛИДАРИЗИ́РОВАТЬСЯ** и **СОЛИДАРИЗОВА́ТЬСЯ** *сов., несов.*; *книжн.* теләктәшлек белдереү (күрһәтеү), фекергә ҡушылыу

**СОЛИДА́РНОСТЬ** *ж* **1.** теләктәшлек, берҙәмлек, фекерҙәшлек, солидарлыҡ; **междунаро́дная солида́рность** халыҡ-ара теләктәшлек **2.** *юр.* (*совместная ответственность*) уртаҡ яуаплылыҡ

**СОЛИДА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** теләктәш, теләктәшлек (солидарлыҡ) белдергән (күрһәткән), фекергә ҡушылған; **быть солида́рным с докла́дчиком** докладсының фекеренә ҡушылыу **2.** *юр.* уртаҡ; **солида́рная отве́тственность** уртаҡ яуаплылыҡ

**СОЛИ́ДНОСТЬ** *ж* **1.** төплөлөк, нигеҙлелек, төплө (нигеҙле) булыу; **соли́дность зна́ний** белемдең төплөлөгө **2.** етдилек, төплөлөк, күренеклелек, етди (төплө, күренекле) булыу; **соли́дность учи́теля** уҡытыусының етдилеге **3.** (*представительность*) мөһабәт төҫ-киәфәт, олпатлыҡ, мөһабәтлек; **соли́дность мане́р** тотош олпатлығы

**СОЛИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*прочный*) ныҡ, ныҡ (шәп) итеп эшләнгән; **соли́дный дом** ныҡ итеп эшләнгән йорт **2.** (*глубокий, серьёзный*) төплө, нигеҙле, етди; **соли́дный о́пыт рабо́ты** етди эш тәжрибәһе **3.** (*заслуживающий доверия*) танылған, күренекле, абруйлы; **соли́дный учёный** күренекле ғалим; **соли́дные лю́ди** танылған кешеләр **4.** (*степенный, представительный*) мөһабәт ҡиәфәтле, мөһабәт, олпат; **соли́дный вид** олпат төҫ-киәфәт **5.** (*пожилой — о возрасте*) бик үк йәш түгел, оло ғына, шаҡтай оло; **соли́дный мужчи́на** шаҡтай оло ир **6.** *разг.* (*довольно большой*) шаҡтай ҙур (юғары); **соли́дный успе́х** шаҡтай ҙур уңыш; **соли́дная су́мма** шаҡтай ҙур аҡса (сумма)

**СОЛИДО́Л** *м*; *спец.* солидол (*ҡуйы техник май*)

**СОЛИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тоҙлай торған, тоҙлау ...ы; **соли́льный цех** тоҙлау цехы

**СОЛИ́ЛЬЩИК** *м* тоҙлаусы (*эшсе*)

**СОЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* соло башҡарыу, солист булыу

**СОЛИ́СТ** *м* и **СОЛИ́СТКА** *ж* солист (*соло партияһын башҡарған йырсы музыкант йәки бейеүсе*)

**СОЛИТЕ́Р** *м* (*крупный бриллиант, вправленный в перстень, брошь и т.д.*) солитер

**СОЛИТЁРЫ** *мн.* (*ед.* **солитёр** *м*); *зоол.* солитёрҙар (*кеше, мал эсәгендә паразит булып йәшәгән таҫма селәүсендәр отряды*)

**СОЛИ́ТЬ** *несов. что* **1.** тоҙ һалыу (һибеү), тоҙлау; **соли́ть суп** ашҡа тоҙ һалыу **2.** тоҙ һибеү, тоҙло итеү, тоҙлау (*боҙолмаһын өсөн*); **соли́ть ры́бу** балыҡ тоҙлау; **соли́ть огурцы́** ҡыяр тоҙлау **3.** *кому*; *перен., разг.* (*делать неприятности*) ҡанға тоҙ һалыу, асыу килтереү

**СОЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*заготавливаться впрок*) тоҙланыу **2.** *страд. от* **соли́ть** 1, 2

**СО́ЛКА** *ж см.* **соли́ть** 2; **со́лка огурцо́в** ҡыяр тоҙлау

**СО́ЛНЕЧНО 1.** *нареч.* ҡояш кеүек; **со́лнечно сверка́ть** ҡояш кеүек ялтырау **2.** *в знач. сказ., безл.* ҡояшлы; **сего́дня со́лнечно** бөгөн ҡояшлы

**СО́ЛНЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡояш ...ы; **со́лнечное тепло́** ҡояш йылыһы; **со́лнечные лучи́** ҡояш нурҙары; **со́лнечная батаре́я** ҡояш батареяһы **2.** ҡояшлы, ҡояш төшә торған; **со́лнечная ко́мната** ҡояшлы бүлмә; **со́лнечный день** ҡояшлы көн **3.** *перен.* (*радостный, счастливый*) шат, шатлыҡлы; **со́лнечная улы́бка** шатлыҡлы йылмайыу ♦ **Со́лнечная систе́ма** *астр.* Ҡояш системаһы; **со́лнечные часы́** ҡояш сәғәте (*ҡояштан төшкән күләгәгә ҡарап ваҡытты билдәләй торған ҡорамал*); **со́лнечный уда́р** ҡояш (көн) һуғыу; **со́лнечное сплете́ние** *анат.* күкрәк ауыҙы

**СО́ЛНЦЕ** *с* **1.** ҡояш; **восхо́д со́лнца** ҡояш сығыу; **враще́ние Земли́ вокру́г Со́лнца** Ерҙең Ҡояш тирәләй әйләнеүе **2.** яҡтылыҡ, нур, эҫе(лек); **гре́ться на со́лнце** эҫегә ҡыҙыныу ♦ **до со́лнца** ҡояш сыҡҡансы; **по со́лнцу (идти́, дви́гаться)** ҡояшҡа ҡарап (барыу)

**СОЛНЦЕЗАЩИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое ҡояш (көн) ҡағар, ҡояштан һаҡлана торған; **солнцезащи́тные очки́** ҡояш ҡағар күҙлек

**СОЛНЦЕЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡояш яратыусан (ятраҡан); **солнцелюби́вые расте́ния** ҡояш яратыусан үҫемлектәр

**СОЛНЦЕПЁК** *м* ҡояш ҡыҙҙырыуы, ҡояш ҡыҙҙыра торған ер (урын), ҡояш (көн) бите

**СОЛНЦЕСТОЯ́НИЕ** *с*; *астр.* Ҡояш торошо (*Ҡояш үҙәге эклиптиканың иң төньяҡ йәки көньяҡ нөктәһенән үткән мәл; йәйен 21—22 июндә, ҡышын 21—22 декабрҙә була*); **зи́мнее солнцестоя́ние** ҡышҡы ҡояш торошо; **ле́тнее солнцестоя́ние** йәйге ҡояш торошо

**СО́ЛО 1.** *с нескл.* соло (*бер музыка ҡоралында башҡарыу йәки яңғыҙ йырлау өсөн тәғәйенләнгән музыкаль әҫәр; бер кеше башҡарған бейеү, айырым партия йәки уның бер өлөшө*) **2.** *в знач. нареч.* яңғыҙ; **петь со́ло** яңғыҙ йырлау; **танцева́ть со́ло** яңғыҙ бейеү

**СОЛОВЕ́Й** *м* һандуғас, былбыл; **пе́ние соловья́** һандуғас һайрауы ♦ **петь (залива́ться, разлива́ться) соловьём** һандуғас булып һайрау (*алдау, арбау ниәте менән матур итеп, килештереп һөйләү*)

**СОЛОВЕ́ТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** (*о взгляде, глазах*) тоноу, томаланып тороу (*күҙгә ҡарата*); **глаза́ солове́ли** күҙҙәр томаланып тора **2.** иҙрәү, йоҡомһорап китеү; **солове́ть от уста́лости** арыуҙан йоҡомһорап китеү

**СОЛО́ВЫЙ I,** -ая, -ое (*о масти лошади*) ҡола (*үҙе һары, ҡойроҡ-ялы ҡара*)

**СОЛО́ВЫЙ II,** -ая, -ое **1.** тоноҡ, томаланып торған; **соло́вые глаза́** тоноҡ күҙҙәр **2.** (*вялый, сонный — о человеке*) йоҡоло, йоҡо баҫҡан

**СОЛОВЬИ́НЫЙ,** -ая, -ое һандуғас ...ы, былбыл ...ы; **соловьи́ные тре́ли** һандуғас сутылдауы

**СО́ЛОД** *м* ҡур, һалат (*бура, һыра һ.б. эсемлектәр әҙерләгәндә ҡулланыла торған шыттырып киптерелгән бойҙай, арыш, һоло һ.б.*); **ржано́й со́лод** арыш ҡуры; **суши́ть со́лод** һалат киптереү

**СОЛОДИ́ТЬ** *несов. что* һалат шыттырыу (яһау, әҙерләү), ҡур яһау

**СОЛОДИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **солоди́ть**

**СОЛО́ДКА** *ж* татлы тамыр, ҡурйын үләне (*медицинала, сәнәғәттә ҡулланыла*)

**СОЛОДКО́ВЫЙ,** -ая, -ое татлы тамыр ...ы, ҡурйын үләне ...ы

**СОЛО́МА** *ж* һалам; **пшени́чная соло́ма** бойҙай һаламы

**СОЛО́МЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** һалам; **соло́менная кры́ша** һалам түбә; **соло́менная шля́па** һалам эшләпә **2.** (*о цвете*) асыҡ һары, һалам төҫөндәге; **соло́менные во́лосы** һалам төҫөндәге сәс ♦ **соло́менная вдова́** *шутл.* ваҡытлыса иренән айырым йәшәгән ҡатын

**СОЛО́МИНА** *ж* һалам бөртөгө, бер бөртөк һалам

**СОЛО́МИНКА** *ж см.* **соло́мина** ♦ **хвата́ться за соло́минку** һаламға йәбешеү (тотоноу) (*ышаныслыҙ нәмә ярҙамында ниндәйҙер бәлә-ҡазанан ҡотолорға маташыу*)

**СОЛО́МИСТЫЙ,** -ая, -ое *спец.* **1.** (*о злаках*) буйға үҫә торған, оҙон һабаҡлы, һаламды күп бирә торған; **соло́мистые хлеба́** буйға үҫә торған иген **2.** (күп) һаламлы, (күп) һалам һалынған; **соло́мистый корм** һаламлы мал аҙығы

**СОЛО́МКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **соло́ма 2.** *спец.* етен (киндер) һабағы; **замо́чка льняно́й соло́мки** етен һабағын ебетеү **3.** *спец.* ағас таяҡса (*башына көкөрт яғып шырпы эшләнә*) **4.** соломка (*таяҡса рәүешендәге кәнфит, печенье, макарон һ.б.*)

**СОЛОМО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "һалам" мәғәнәһендә ҡулланылған тәүге өлөшө, мәҫ.,* **соломокопни́тель** һалам өйгөс

**СОЛОМО́НОВ: соломо́ново реше́ние** *книжн.* Сөләймән (пәйғәмбәр) хөкөмө (*ауыр мәсьәләне аҡыллы һәм ябай хәл итеү*)

**СОЛОМОРЕ́ЗКА** *ж* һалам турағыс (*машина*)

**СОЛОНИ́НА** *ж* тоҙло ит, тоҙлаған (тоҙланған) ит

**СОЛОНИ́ННЫЙ,** -ая, -ое тоҙло ит ...ы, тоҙланған ит ...ы

**СОЛО́НКА** *ж* тоҙ һауыты

**СОЛОНЦЕВА́ТОСТЬ** *ж* тоҙға бай булыу; **солонцева́тость по́чвы** тупраҡтың тоҙға бай булыуы

**СОЛОНЦЕВА́ТЫЙ,** -ая, -ое тоҙға бай; **солонцева́тая земля́** тоҙға бай тупраҡ

**СОЛОНЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое тоҙло; **солонцо́вые по́чвы** тоҙло тупраҡтар

**СОЛОНЦЫ́** *мн.* (*ед.* **солоне́ц** *м*) **1.** *только мн.* тоҙло тупраҡ **2.** (*озеро, ключ с солёной водой*) тоҙло күл (шишмә)

**СОЛОНЧАКИ́** *мн.* (*ед.* **солонча́к** *м*) **1.** *только мн.* тоҙло тупраҡ **2.** *см.* **солонцы́** 2

**СОЛОНЧАКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** тоҙло; **солончако́вые по́чвы** тоҙло тупраҡ **2.** тоҙло ерҙә (туп-

раҡта) үҫкән; **солончако́вые расте́ния** тоҙло тупраҡта үҫә торған үҫемлектәр

**СОЛЬ I** *ж* **1.** тоҙ; **пова́ренная соль** аш тоҙо **2.** *перен.* төп нигеҙ, булмыш, асыл; **соль ру́сского я́зыка** урыҫ теленең төп нигеҙе **3.** *перен.* төп мәғәнә; **соль вопро́са** мәсьәләнең төп мәғәнәһе **4.** *кого-чего* иң яҡшы вәкилдәре, мәртәбәле кешеләр; **соль министе́рства** министрлыҡтың мәртәбәле кешеләре **5.** тоҙ (*кислотаның водородын металл алмаштырғандан барлыҡҡа килгән химик матдә*); **гла́уберова соль** глаубер тоҙо; **кали́йная соль** калий тоҙо ♦ **соль земли́** донъя тотҡаһы, донъя терәге; **пуд со́ли съесть** бергәләп күпте күреү, күп бергә булыу; **атти́ческая соль** *см.* **атти́ческий**; **хлеб да соль**; **хлеб и соль**; **хле́б-со́ль** *см.* **хлеб**

**СОЛЬ II** *ж нескл.*; *муз.* соль (*музыка гаммаһының бишенсе нотаһы*)

**СО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое яңғыҙ (башҡарылған); **со́льное пе́ние** яңғыҙ йырлау

**СОЛЯ́НКА I** *ж* тоҙут

**СОЛЯ́НКА II** *ж* солянка (*ит, балыҡ йәки бәшмәк ҡушып быҡтырылған кәбеҫтә ашы*)

**СОЛЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** тоҙ ...ы; **соляны́е отложе́ния** тоҙ ҡатламдары; **соляно́й раство́р** тоҙ иретмәһе **2.** тоҙло; **соляно́е о́зеро** тоҙло күл **3.** тоҙ сығарыу ...ы; **соляны́е разрабо́тки** тоҙ сығарыу

**СОЛЯ́НЫЙ: соля́ная кислота́** тоҙ кислотаһы, хлорид кислотаһы

**СОЛЯ́Р** *м* и **СОЛЯ́РКА** *ж*; *разг.* солярка (*яғыулыҡ төрө*)

**СОЛЯРИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** ҡояш нурҙары менән нурланыу (*дауалау маҡсатында*) **2.** *фото.* соляризация

**СОЛЯ́РИЙ** *м* солярий (*ҡояшта ҡыҙыныу өсөн йыһазландырылған асыҡ урын*)

**СОЛЯ́РОВЫЙ: соля́ровое ма́сло** соляр майы

**СОМ** *м* йәйен (*балыҡ*)

**СОМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *биол.*, *мед.* тән ...ы, тәнгә ҡараған; **сомати́ческие боле́зни** тән ауырыуҙары

**СОМАТОЛО́ГИЯ** *ж* соматология (*антропологияның кеше тәнен, уның төҙөлөшөн өйрәнә торған бер бүлеге*)

**СОМБРЕ́РО** *с нескл.* сомбреро (*киң тирәсле эшләпә*)

**СО́МКНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сомкну́ть 2.** *прил.* араһы яҡын, йыш, тығыҙ; **со́мкнутые насажде́ния** йыш ултыртылған ағастар; **со́мкнутые ряды́** *волн.*, *спорт.* тығыҙ сафтар

**СОМКНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** яҡынайтыу, ҡушыу, йышайтыу, тығыҙландырыу; **сомкну́ть но́жки ци́ркуля** йәзбәнең саталарын бер-береһенә яҡынайтыу **2.** ҡымтыу, ҡымтып ябыу, йомоу; **сомкну́ть гу́бы** ирендәрҙе ҡымтыу ♦ **не сомкну́ть глаз** күҙ ҙә йоммау, керпек тә ҡаҡмау (*бөтөнләй йоҡлай алмау*); **сомкну́ть ряды́** бергә ойошоу, берҙәм булыу

**СОМКНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** яҡынайыу, ҡушылыу, тығыҙланыу, тоташыу; **кана́л сомкну́лся с реко́й** канал йылға менән тоташты **2.** (*закрыться — о глазах и т.п.*) йомолоу; **глаза́ сомкну́лись** күҙҙәр йомолдо

**СОМНА́МБУЛА** *ж* и **СОМНА́МБУЛ** *м* (*лунатик*) илерек

**СОМНАМБУЛИ́ЗМ** *м* илереү

**СОМНАМБУЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое илереү ...ы; **сомнамбули́ческое состоя́ние** илереү хәле

**СОМНЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *в чём* шикләнеү, шикләнеп ҡарау, шик (шөбһә) тотоу, шөбһәләнеү, ышанып етмәү; **сомнева́ться в слова́х** *чьих-л.* кемдеңдер һүҙҙәренә шикләнеп ҡарау **2.** (*испытывать колебания*) икеләнеү, шикләнеү

**СОМНЕ́НИЕ** *с* шик, шөбһә, шикләнеү, шөбһәләнеү; **вызыва́ть сомне́ния** шик тыуҙырыу; **не оставля́ть сомне́ний** шик ҡалдырмау; **подверга́ть сомне́нию** шик аҫтына алыу ♦ **без (вся́кого) сомне́ния**; **вне (вся́кого) сомне́ния** *в знач. вводн. сл.* һис шикһеҙ

**СОМНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шикле, шик уятҡан, шик тыуҙырған; **сомни́тельное родство́** шикле туғанлыҡ **2.** (*не вызывающий доверия*) шик тыуҙырған, шикле, ышанысһыҙ; **сомни́тельные лю́ди** шикле кешеләр **3.** (*подозрительный*) шик уятҡан, шиге булған, шомло, шөбһәле; **сомни́тельная тишина́** шомло тынлыҡ **4.** *разг.* төрлөсә уйландырған (ҡабул ителгән), икеләндергән, шикләндергән; **сомни́тельная чистота́** шикләндергән таҙалыҡ

**СОМНО́ЖИТЕЛЬ** *м*; *мат.* ҡабатланыусы

**СОМО́ВИЙ,** -ья, -ье и **СОМО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** йәйен ...ы, йәйендән бешерелгән; **сомо́вья уха́** йәйен һурпаһы **2.** йәйен ...ы, йәйен өсөн тәғәйенләнгән; **сомо́вий крючо́к** йәйен ҡармағы

**СОМО́ВИНА** *ж* (*мясо сома как пища*) йәйен ите

**СОН** *м* **1.** йоҡо; **глубо́кий сон** тәрән йоҡо; **у́тренний сон** иртәнге йоҡо; **кло́нит ко сну** йоҡо баҫыу (килеү); **потеря́ть сон** йоҡо ҡасыу; **чу́ткий сон** һаҡ йоҡо **2.** (*сновидение*) төш; **ви́деть сон** төш күреү; **ве́рить в сны** төшкә ышаныу **3.** *см.* **спя́чка** 1 ♦ **летарги́ческий сон** *см.* **летарги́ческий**; **прия́тного сна** тыныс (татлы) йоҡо; **на сон гряду́щий** *см.* **гряду́щий**; **спать (засну́ть, усну́ть) ве́чным сном** үлеү

**СОНАНИМА́ТЕЛЬ** *м*; *юр.* (*тот, кто нанимает кого-что-л. совместно с кем-л.*) бергәләп яллаусы

**СОНАСЛЕ́ДНИК** *м* и **СОНАСЛЕ́ДНИЦА** *ж*; *юр.* мираҫташ, уртаҡ мираҫлы кеше

**СОНА́ТА** *ж* соната (*төрлө темптағы һәм төрлө характерҙағы өс-дүрт өлөштән торған инструменталь музыка әҫәре*); **сона́та Бетхо́вена** Бетховен сонатаһы

**СОНА́ТНЫЙ,** -ая, -ое соната(лар) ...ы; **сона́тный цикл** сонаталар циклы

**СОНЕ́Т** *м* сонет (*ун дүрт юллыҡ шиғыр формаһы*)

**СОНЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое сонетҡа хас, сонетҡа нигеҙләнгән; **соне́тная компози́ция** сонетҡа хас композиция

**СОНЛИ́ВОСТЬ** *ж* йоҡо баҫыу (килеп тороу)

**СОНЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*отличающийся сонливостью*) йоҡосо, йоҡо яратҡан, йоҡоға əүəҫ; **сонли́вый ребёнок** йоҡосо бала **2.** (*сонный*) йоҡоло, йоҡо баҫҡан; **сонли́вый вид** йоҡоло ҡиəфəт **3.** (*бездеятельный*) һүлпəн, яй ҡуҙғалыусан; **сонли́вый челове́к** һүлпəн кеше

**СОНМ** *м*; *книжн.*, *уст.* сиктəн тыш (иҫəпһеҙ-хисапһыҙ) күп, бер көтөү ♦ **причи́слить к со́нму** *кого*; *книжн.* иҫəпкə (рəтенə) индереү

**СО́ННИК** *м* төшлөк, төш юрағыс

**СО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** йоҡо(ло), йоҡо ...ы, йоҡлаған; **в со́нном состоя́нии** йоҡо хəлендə **2.** йоҡоло, йоҡо баҫҡан; **со́нные глаза́** йоҡоло күҙҙəр **3.** *перен.* (*бездеятельный*, *пассивный*) бер төрлө генə (яй ғына) барған, һүлпəн; **со́нная жизнь** бер төрлө генə барған тормош ♦ **со́нная арте́рия** *анат.* йоҡо (барлау) тамыры; **со́нная боле́знь** йоҡо ауырыуы (*тропик Африкала биҙгəк тотоу, баш ауыртыу, психика боҙолоу һəм ныҡ йоҡо килеү менəн үтə торған йоғошло ауырыу*)

**СОНО́РНЫЙ:** **соно́рные согла́сные** *лингв.* сонор (талғын) тартынҡылар (*тауыш ярҙамында яһалған тартынҡылар*)

**СО́НЯ** **1.** *м* и *ж*; *разг.* йоҡосо, йоҡо ҡапсығы (сүлмəге) **2.** *ж*; *зоол.* йоҡосо (*кимереүселəр отрядына ҡараған ваҡ йəнлек*)

**СООБРАЖА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* (*понимать*) аңлау, төшөнөү, фекер йөрөтə алыу **2.** *разг.* (*быть сообразительным*) зирəк (башлы) булыу, тиҙ генə фекер йөрөтə белеү **3.** *в чём* и *без доп.*; *разг.* (*быть сведущим в чём-л.*) белемле, мəғлүмəтле булыу

**СООБРАЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сообража́ть** **2.** (*мысль, предположение*) уй, фекер; **у меня́ есть свои́ соображе́ния** минең үҙ фекерем бар ♦ **приня́ть (взять) в соображе́ние** иҫкə алыу, күҙ уңында тотоу

**СООБРАЗИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* тиҙ төшөнөүсəнлек (аңлаусанлыҡ), зирəклек, отҡорлоҡ, үткерлек

**СООБРАЗИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тиҙ төшөнөп (аңлап) алыусан, зирəк, отҡор, үткер; **сообрази́тельный ма́льчик** зирəк малай

**СООБРАЗИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*понять*) төшөнөү, аңлау, төшөнөп (аңлап) алыу **2.** (*найти ответ*) тиҙ генə яуап табыу (ҡарарға килеү) **3.** *прост.*, *обычно шутл.* (*быстро организовать что-л.*) тиҙ генə (ашыҡ-бошоҡ) əтмəлəп алыу

**СООБРА́ЗНО** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* маҡсатҡа ярашлы (тура килеп торған) **2.** *предлог с дат. п.* (*согласно чему-л.*, *в соответствии с чем-л.*) ярашлы рəүештə, тура килтереп, -ға/-гə ҡарап (ярашлы); **поступа́ть сообра́зно обстоя́тельствам** шарттарға ярашлы эшлəү

**СООБРА́ЗНОСТЬ** *ж* маҡсатҡа ярашлылыҡ (тура килеүсəнлек)

**СООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое маҡсатҡа ярашлы (тура килеп торған)

**СООБРАЗОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. что*, *с чем*; *книжн.* ярашлы итеү, яраштырыу, тура килтереү; **сообразова́ть расхо́ды с дохо́дами** сығымдарҙы килемдəр менəн тура килтереү

**СООБРАЗОВА́ТЬСЯ** *сов.*, *несов. с чем*; *книжн.* **1.** (*поступить согласно чему-л.*) ярашлы итеү, яраштырыу, тура килтереү **2.** (*быть в соответствии с чем-л.*) ярашлы булыу, ярашыу, тура килтереп тороу

**СООБЩА́** *нареч.* бергə, бергəлəп, бергəлəшеп, күмəклəп, күмəклəшеп; **рабо́тать сообща́** бергəлəп эшлəү

**СООБЩА́ТЬ** *несов. см.* **сообщи́ть**

**СООБЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сообщи́ться** **2.** *с чем* и *без доп.* (*иметь сообщение*) тоташыу, ҡушылыу **3.** *о ком-чём* хəбəр ителеү; **в газе́те сообща́ется о фестива́ле** гəзиттə фестиваль хаҡында хəбəр ителə **4.** хəбəрлəшеү, элемтə (бəйлəнеш) тотоу; **сообща́ться по телефо́ну** телефон аша хəбəрлəшеү **5.** *страд. от* **сообща́ть**

**СООБЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сообщи́ть** – **сообща́ть**, **сообщи́ться** – **сообща́ться**; **сообще́ние о пого́де** һауа торошо тураһында белдереү **2.** (*известие*) хəбəр, белдереү, белдермə; **официа́льное сообще́ние** рəсми белдереү; **по после́дним сообще́ниям** һуңғы хəбəрҙəр буйынса **3.** (*связь*) элемтə, бəйлəнеш; **железнодоро́жное сообще́ние** тимер юл бəйлəнеше

**СОО́БЩЕСТВО** *с* **1.** (*объединение*) берлəшмə, ширҡəт **2.** *биол.* өйкөм, төркөм ♦ **в соо́бществе** *с кем*; *книжн.* бергəлəшеп, берлəшеп, бер һүҙҙə булып

**СООБЩИ́ТЬ** *сов. что*, *о чём* и *без доп.* **1.** хəбəр итеү, белдереү, əйтеү, кемгəлер еткереү; **сообщи́ть свой а́дрес** үҙ адресын белдереү; **сообщи́ть реше́ние учёного сове́та коллекти́ву** коллективҡа ғилми совет ҡарарын еткереү **2.** (əйтеп, һөйлəп) биреү; **сообщи́ть но́вости** яңылыҡтарҙы һөйлəп биреү; **сообщи́ть та́йну** серҙе əйтеп биреү (сисеү)

**СООБЩИ́ТЬСЯ** *сов. кому* (*передаться другому*) күсеү, бирелеү, таралыу; **его́ ра́дость сообщи́лась окружа́ющим** уның шатлығы тирə-яҡтағыларға күсте

**СОО́БЩНИК** *м* и **СОО́БЩНИЦА** *ж* енəйəттəш, бергə енəйəт ҡылыусы (эшлəүсе)

**СОО́БЩНИЧЕСТВО** *с* енəйəт эшенə ҡатнашыу

**СООРУДИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡороу, төҙөү, һалыу, торғоҙоу, күтəреү; **сооруди́ть дом** йорт төҙөү **2.** *разг.*, *шутл.* тиҙ генə əҙерлəү, əтмəлəү; **сооруди́ть яи́чницу** йомортҡа тəбейəһе əтмəлəү

**СООРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **сооруди́ть**

**СООРУЖА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **сооружа́ть**

**СООРУЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сооруди́ть – сооружа́ть**; **сооруже́ние а́томных электроста́нций** атом электростанцияларын төҙөү **2.** (*постройка*) ҡоролма, ҡоролош, төҙөлөш; **спорти́вные сооруже́ния** спорт ҡоролмалары; **оборони́тельные сооруже́ния** оборона ҡоролмалары

**СООТВЕ́ТСТВЕННО** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* ярашлы рәүештә, тейешенсә; **вести́ себя́ соотве́тственно** үҙеңде тейешенсә тотоу **2.** *предлог с дат. п.* (*согласно, сообразно чему-л., в зависимости от чего-л.*) ярашлы итеп, -ға/-гә ҡарап; **де́йствовать соотве́тственно обстоя́тельствам** шарттарға ҡарап эш итеү; **поступа́ть соотве́тственно инстру́кции** инструкцияға ярашлы итеп эш итеү

**СООТВЕ́ТСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *чему*; *книжн.* ярашлы, тейешле; **соотве́тственная дипло́му рабо́та** дипломға ярашлы эш **2.** (*надлежащий*) тейешле, кәрәкле; **приня́ть соотве́тственные ме́ры** тейешле саралар күреү

**СООТВЕ́ТСТВИЕ** *с* ярашлылыҡ, ярашыу, тура (тап) килеү; **соотве́тствие интере́сов** мәнфәғәттәрҙең тап килеүе ♦ **в соотве́тствии** *с чем*; *в знач. предлога* ярашлы итеп, ярашлы рәүештә

**СООТВЕТСТВОВАТЬ** *несов. чему* ярашыу, ярашлы булыу, тура (тап) килеү; **све́дения соотве́тствуют действи́тельности** мәғлүмәттәр ысынбарлыҡҡа тап килә

**СООТВЕ́ТСТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **соотве́тствовать** **2.** *прил.* тейешле, ярашлы; **обрати́ться в соотве́тствующие учрежде́ния** тейешле учреждениеларға мөрәжәғәт итеү

**СООТВЕ́ТЧИК** *м* и **СООТВЕ́ТЧИЦА** *ж*; *юр.* яуапташ

**СООТЕ́ЧЕСТВЕННИК** *м* и **СООТЕ́ЧЕСТВЕННИЦА** *ж* ватандаш, илдәш

**СООТНЕСЕ́НИЕ** *с см.* **соотнести́ – соотноси́ть**; **соотнесе́ние слов с ко́дом** һүҙҙәр менән кодты сағыштырып ҡарау

**СООТНЕСТИ́** *сов. что* (*сопоставить*) бәйләнеште (мөнәсәбәтте) билдәләү, сағыштырып (тиңләштереп) ҡарау

**СООТНЕСТИ́СЬ** *сов.* сағыштырып (тиңләштереп) булыу

**СООТНОСИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* бәйләнешлелек, мөнәсәбәттәшлек, бәйләнештә (мөнәсәбәттә) булыу; **соотноси́тельность поня́тий** төшөнсәләрҙең бәйләнешлелеге

**СООТНОСИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бәйләнешле, мөнәсәбәттәш, тиңләштерергә (сағыштырырға) мөмкин булған; **соотноси́тельные поня́тия** бәйләнешле төшөнсәләр

**СООТНОСИ́ТЬ** *несов. см.* **соотнести́**

**СООТНОСИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **соотнести́сь** **2.** *страд. от* **соотноси́ть**

**СООТНОШЕ́НИЕ** *с* мөнәсәбәт, нисбәт; **соотноше́ние сил** көстәр нисбәте

**СОПЕ́НИЕ** *с см.* **сопе́ть**

**СОПЕ́РНИК** *м* и **СОПЕ́РНИЦА** *ж* **1.** ярышыусы, ярышташ **2.** (*в любви*) көнәркәш, көндәш **3.** (*тот, кто обладает равными с кем-л. достоинствами*) тиңдәш, тиң (кеше)

**СОПЕ́РНИЧАТЬ** *несов.* **1.** (*состязаться*) ярышыу, уҙышыу; **сопе́рничать на ри́нге** рингыла ярышыу **2.** (*в любви*) көндәш (көнәркәш) булыу **3.** тиңләшеү, тиң (тигеҙ) булыу

**СОПЕ́РНИЧЕСТВО** *с см.* **сопе́рничать**; **сопе́рничество в спо́рте** спортта ярышыу; **сопе́рничество в любви́** мөхәббәттә көндәшлек

**СОПЕ́ТЬ** *несов.* мышнау, мыш-мыш итеү; **сопе́ть но́сом** танау менән мышнау

**СО́ПКА** *ж* **1.** (*небольшая гора с округлой вершиной*) түбә, түбәсек, сусаҡ **2.** (*название вулкана на Камчатке и Курильских островах, а также грязевого вулкана в Крыму и на Кавказе*) янартау, вулкан; **Ключевска́я со́пка** Ключевская янартауы

**СОПЛЕМЕ́ННИК** *м* и **СОПЛЕМЕ́ННИЦА** *ж* нәҫелдәш, ҡәбиләләш (*яҡын, ете ят түгел*)

**СОПЛЕМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое туғандаш, нәҫелдәш, сығышы бер (бер ҡәүем); **соплеме́нные наро́ды** туғандаш халыҡтар

**СОПЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** маңҡалы, маңҡа; **сопли́вый ребёнок** маңҡалы бала **2.** *перен., прост.* маңҡа, етлекмәгән (*балалыҡтан сыҡмаған, тәжрибәһеҙ кешегә ҡарата*); **сопли́вый мальчи́шка** маңҡа малай

**СОПЛО́** *с*; *тех.* сопло; **сопло́ турби́ны** турбина соплоһы

**СОПЛО́ДИЕ** *с*; *бот.* ҡуш емеш

**СОПЛЯ́** *ж*; *прост., в разн. знач.* маңҡа

**СОПЛЯ́К** *м*; *прост., в разн. знач.* маңҡа танау, маңҡа

**СОПОДЧИНЕ́НИЕ** *с* **1.** *книжн. см.* **соподчини́ть – соподчиня́ть** **2.** *грам.* тиң (тиңдәш) эйәртеү

**СОПОДЧИНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **соподчини́ть – соподчиня́ть** 1; **2.** *прил.* тиң бойондороҡло ♦ **соподчинённые предложе́ния** *грам.* тиңдәш эйәрсән һөйләмдәр

**СОПОДЧИНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* тиң эйәртеүле; **соподчини́тельные предложе́ния** тиң эйәртеүле һөйләмдәр

**СОПОДЧИНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, кому-чему*; *книжн.* буйһондороу (*бер үк ваҡытта һәм бер үк нәмәгә*) **2.** *грам.* тиңдәш (тиң) эйәртеү

**СОПОДЧИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **соподчини́ть**

**СОПОСТАВИ́МЫЙ,** -ая, -ое сағыштырырлыҡ, сағыштыра алырлыҡ, тиңләштерерлек; **сопостави́мые величи́ны** сағыштырырлыҡ дәүмәлдәр

**СОПОСТАВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сағыштырма, сағыштырмалы; **сопостави́тельная грамма́тика** сағыштырма грамматика

**СОПОСТА́ВИТЬ** *сов. кого-что* сағыштырыу, тиңләштереү, сағыштырып (тиңләштереп) ҡарау; **сопоста́вить поня́тия** төшөнсәләрҙе сағыштырыу

**СОПОСТА́ВИТЬСЯ** *сов.* сағыштырылыу, тиңләшмәле булыу

**СОПОСТАВЛЕ́НИЕ** *с см.* **сопоста́вить** – **сопоставля́ть**; **сопоставле́ние собы́тий** ваҡиғаларҙы сағыштырып ҡарау

**СОПОСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **сопоста́вить**

**СОПОСТАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сопоста́виться** **2.** *страд. от* **сопоставля́ть**

**СОПРАВИ́ТЕЛЬ** *м* и **СОПРАВИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* хакимдаш

**СОПРА́НО** **1.** *с нескл.*; *муз.* сопрано (*йырсы ҡатын-ҡыҙҙарҙа иң юғары тауыш*; *күп тауышлы музыка әҫәрендә иң юғары тауыш*) **2.** *ж нескл.*; *разг.*, *муз.* сопрано (*шундай тауышлы йырсы ҡатын-ҡыҙ*)

**СОПРА́НОВЫЙ,** -ая, -ое сопрано ...ы; **сопра́новая па́ртия** сопрано партияһы

**СОПРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **сопре́ть**

**СОПРЕДЕ́ЛЬНОСТЬ** *ж* сиктәшлек, йәнәшлек; **сопреде́льность поня́тий** төшөнсәләрҙең сиктәшлеге; **сопреде́льность стран** илдәрҙең сиктәшлеге

**СОПРЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сиктәш, йәнәш; **сопреде́льные зе́мли** сиктәш ерҙәр

**СОПРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* серек, бәҫәргән, ҡыҙған, ҡыҙып (янып) серегән; **сопре́лая рожь** ҡыҙып серегән арыш; **сопре́лая соло́ма** бәҫәргән һалам

**СОПРЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ҡыҙып (янып) сереү, бәҫәреү

**СОПРИКАСА́ТЬСЯ** *несов. с кем-чем* и *без доп.* **1.** (бер-береһенә) тейеү, ҡағылыу, ороноу; **соприкаса́ться локтя́ми** терһәктәр менән ҡағылыу **2.** сиктәш (йәнәш) булыу, тоташыу; **земе́льные уча́стки соприкаса́ются** ер бүлемдәре сиктәш **3.** *перен.* уртаҡ (бәйләнешле) булыу, үҙ-ара бәйләнештә булыу, араһында уртаҡлыҡ бар (юҡ); **на́ши жела́ния не соприкаса́ются** беҙҙең теләктәр араһында уртаҡлыҡ юҡ **4.** *перен.* (*сталкиваться*) аралашыу, ҡатнашыу, эш итеү; **соприкаса́ться с разли́чными людьми́** төрлө кешеләр менән аралашыу

**СОПРИКОСНОВЕ́НИЕ** *с* **1.** йәнәш (сиктәш) булыу, тоташыу; **ли́ния соприкоснове́ния** һыҙыҡтарҙың тоташыуы **2.** бәрелештә булыу, бер (яҡын) булыу; **соприкоснове́ние с проти́вником** дошман менән бәрелешеү

**СОПРИКОСНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **соприкаса́ться**

**СОПРИЧА́СТНОСТЬ** *ж* ҡатнашы (мөнәсәбәте) булыу, ҡатнашы (мөнәсәбәте) булғанлыҡ

**СОПРИЧА́СТНЫЙ,** -ая, -ое ҡатнашы (мөнәсәбәте) булған

**СОПРОВОДИ́ТЕЛЬ** *м* и **СОПРОВОДИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* оҙатыусы, оҙатып барыусы (йөрөтөүсе)

**СОПРОВОДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** оҙатып барыусы, оҙатыусы; **сопроводи́тельные маши́ны** оҙатып барыусы машиналар **2.** теркәп ебәрелгән (ебәрелә торған); **сопроводи́тельное письмо́** теркәп ебәрелгән хат

**СОПРОВОДИ́ТЬ** *сов. см.* **сопровожда́ть**

**СПЕЦИАЛИ́СТ** *м* и **СПЕЦИАЛИ́СТКА** *ж* белгес, специалист; **специали́ст по вну́тренним боле́зням** эске ауырыуҙар буйынса белгес

**СПЕЦИА́ЛЬНО** *нареч.* **1.** махсус, махсус рәүештә; **придти́ специа́льно** махсус килеү; **специа́льно пригото́вить** махсус рәүештә әҙерләү **2.** *разг.* (*намеренно*) юрамал, юрый, махсус, белә тороп; **де́лать специа́льно** юрамал эшләү

**СПЕЦИА́ЛЬНОСТЬ** *ж* һөнәр; **вы́брать специа́льность** һөнәр һайлау; **рабо́тать по специа́льности** һөнәр буйынса эшләү

**СПЕЦИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое махсус, айырым; **специа́льное образова́ние** махсус белем; **специа́льный корреспонде́нт** махсус хәбәрсе; **специа́льные те́рмины** махсус терминдар

**СПЕ́ЦИИ** *мн.* (*ед.* **спе́ция** *ж*) тәмләткестәр; **класть в суп спе́ции** ашҡа тәмләткестәр һалыу

**СПЕЦИ́ФИКА** *ж* үҙенсәлек, специфика; **специ́фика иску́сства** сәнғәт үҙенсәлеге; **специ́фика произво́дства** етештереү үҙенсәлеге

**СПЕЦИФИКА́ЦИЯ** *ж*; *спец.* **1.** (*уточнённая классификация*) төркөмләү, төркөмдәргә айырыу; **специфика́ция карти́н** картиналарҙы төркөмләү **2.** (*документ*) спецификация; **составле́ние специфика́ций на обору́дование** йыһазға спецификация төҙөү

**СПЕЦИФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое үҙенсәлекле, үҙенә генә хас (булған), үҙгәлекле; **специфи́ческий за́пах лека́рства** дарыуҙың үҙенә генә хас еҫе; **специфи́ческое ка́чество** үҙгәлекле сифат

**СПЕЦИФИ́ЧНОСТЬ** *ж* үҙенә генә хас булыу, үҙенсәлеклелек; **специфи́чность рабо́ты** эш үҙенсәлеклелеге

**СПЕЦИФИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **специфи́ческий**

**СПЕЦКО́Р** *м*; *разг.* (*специальный корреспондент*) махсус хәбәрсе

**СПЕЦКУ́РС** *м* (*специальный курс*) махсус курс

**СПЕЦО́ВКА** *ж*; *разг.* махсус эш кейеме

**СПЕЦОДЕ́ЖДА** *ж* махсус кейем

**СПЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** *см.* **запе́чься** 2, 3; **кровь спекла́сь** ҡан ойошҡан **2.** *спец.* утта ҡыҙып сынығыу, яныу, үртәлеү; **гли́на спекла́сь** балсыҡ янған; **у́голь спёкся** таш күмер янған **3.** *см.* **испе́чься**

**СПЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **спе́шить**

**СПЕ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **спе́шиться 2.** *страд. от* **спе́шивать**

**СПЕ́ШИТЬ** *сов. кого-что* йәйәүләтеү, аттан төшөрөү; **спе́шить вса́дников** һыбайлыларҙы аттан төшөрөү

**СПЕШИ́ТЬ** *несов.* **1.** ашығыу, ҡабаланыу; **спеши́ть на по́мощь** ярҙамға ашығыу; **спеши́ть на по́езд** поезға ҡабаланыу; **не спеши́ть с отве́том** яуап бирергә ашыҡмау **2.** алға китеү (*сәғәткә ҡарата*); **часы́ спеша́т** сәғәт алға китә ♦ **не спеша́** ашыҡмайынса, әкрен генә, һалмаҡ ҡына

**СПЕ́ШИТЬСЯ** *сов.* аттан төшөү; **отря́д спе́шился** отряд аттан төштө

**СПЕ́ШКА** *ж*; *разг. см.* **спеши́ть** 1; **в спе́шке** ҡабалан

**СПЕ́ШНОСТЬ** *ж* **1.** ашығыслыҡ; **спе́шность рабо́ты** эштең ашығыслығы **2.** (*торопливость*) ашығыслыҡ, ҡабаланлыҡ

**СПЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*срочный*) ашығыс; **спе́шное де́ло** ашығыс эш; **спе́шная опера́ция** ашығыс операция **2.** (*совершаемый быстро, с торопливостью*) ҡабалан, ашығыс; **спе́шные шаги́** ҡабалан аҙымдар

**СПИВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **спи́ться**

**СПИДО́МЕТР** *м* спидометр

**СПИ́КЕР** *м* спикер (*парламентта палата рәйесе*)

**СПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **спили́ть**

**СПИ́ЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **спи́ливать**

**СПИЛИ́ТЬ** *сов. что* бысыу; **спили́ть де́рево** ағас бысыу

**СПИНА́** *ж* арҡа, һырт; **ложи́ться на́ спину** арҡаға ятыу; **пла́вать на спине́** арҡала йөҙөү; **похло́пать по спине́** арҡанан һөйөү; **поверну́ться спино́й к ве́тру** елгә һыртты ҡуйыу ♦ **за спино́й** *кого-чего* артта, арттан; **за спино́й де́лать** йәшерен (йәшерен рәүештә) эшләү; **на со́бственной спине́ (испыта́ть, почу́вствовать)** үҙ елкәңдә (татыу); **не разгиба́я спины́ (рабо́тать, труди́ться)** алһыҙ-ялһыҙ (эшләү), бил яҙмай (эшләү); **гнуть спи́ну** *см.* **гнуть**; **поверну́ться спино́й** арҡа менән боролоу, иғтибар итмәү; **показа́ть спи́ну** арҡа биреү, арт менән әйләнеү; **пря́таться за спи́ну** арҡаланыу; **выезжа́ть (е́здить) на спине́** *чьей-л.* *кемдеңдер* елкәһендә ултырыу

**СПИ́НКА** *ж* **1.** *уменьш.-ласк. от* **спина́** **2.** арт; **спи́нка дива́на** диван арты; **стул со спи́нкой** артлы ултырғыс **3.** (*тыльная сторона узких предметов*) арт такта; **спи́нка шка́фа** шкафтың арт таҡтаһы

**СПИ́ННИНГ** *м* спиннинг, тәрәштәү (*балыҡ тотоу ҡоралы*)

**СПИННО́Й,** -ая, -ое арҡа …ы ♦ **спинно́й мозг** арҡа мейеһе; **спинно́й хребе́т** арҡа һөйәге

**СПИРА́ЛЬ** *ж* спираль, ишелмә

**СПИРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое спираль һымаҡ, ишелмә; **спира́льная ли́ния** ишелмә һыҙыҡ; **спира́льное сверло́** спираль һымаҡ бырау

**СПИРА́ТЬ** *несов. см.* **спере́ть** 3

**СПИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **спере́ться** **2.** *страд. от* **спира́ть**

**СПИРИ́Т** *м* спирит (*спиритизмға ышанған һәм шөғөлләнгән кеше*)

**СПИРИТИ́ЗМ** *м* спиритизм (*үлгән кешенең рухы менән аралашыу мөмкин тигән мистик ағым*)

**СПИРИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое спиритик; **спирити́ческий сеа́нс** спиритик сеанс

**СПИРИТУАЛИ́ЗМ** *м* спиритуализм (*фәлсәфәләге идеалистик йүнәлеш*)

**СПИРИТУАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое спиритуалистик, спиритуализм …ы; **спиритуалисти́ческие уче́ния** спиритуалистик тәғлимәт

**СПИРО́МЕТР** *м* спирометр (*үпкәнең һауа һыйҙырышлығын үлсәү приборы*)

**СПИРТ** *м* спирт; **древе́сный спирт** ағас спирты; **камфа́рный спирт** камфара спирты; **настоя́ть тра́вы на спирту́** үләнде спиртта төнәтеү ♦ **ви́нный спирт** *см.* **ви́нный**; **муравьи́ный спирт** *см.* **муравьи́ный**; **нашаты́рный спирт** *см.* **нашаты́рный**

**СПИРТНО́Й,** -ая, -ое **1.** спирт …ы; **спиртно́й за́пах** спирт еҫе **2.** спиртлы, иҫерткес; **спиртно́й напи́ток** иҫерткес эсемлек **3.** *в знач. сущ.* **спиртно́е** *с* спиртлы (иҫерткес) эсемлек; **не употребля́ть спиртно́го** иҫерткес эсемлектәрҙе ҡулланмау

**СПИРТОВА́НИЕ** *с*; *спец.* спиртлау, спирт өҫтәү

**СПИРТОВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* спиртлау, спирт өҫтәү; **спиртова́ть вино́** шарапты спиртлау

**СПИРТОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **спиртова́ть**

**СПИРТО́ВКА** *ж* спиртовка, спирт шәме

**СПИРТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** спирт …ы; **спиртово́й за́пах** спирт еҫе; **спиртово́й заво́д** спирт заводы **2.** спиртлы; **спиртова́я кра́ска** спиртлы буяу; **спиртово́й компре́сс** спиртлы боҫлама

**СПИРТОМЕ́Р** *м* спиртомер (*спиртлы эсемлектәрҙең ҡатылығын үлсәгес*)

**СПИСА́НИЕ** *с*; *спец. см.* **списа́ть** 4, 5, **списа́ться** 2; **списа́ние устаре́лого обору́дования** иҫкергән йыһаздарҙы иҫәптән сығарыу

**СПИСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, с чего* күсереү, күсереп яҙыу (алыу); **списа́ть предложе́ние** һөйләмде күсереп яҙыу **2.** *что* (*о рисунке, картине*) күсермәһен яһау; **списа́ть ко́пию с карти́ны** картинаның күсермәһен яһау **3.** *кого-что, с кого-чего* күсереү, алыу, алып яҙыу; **де́йствующие ли́ца пье́сы спи́саны с реа́льных лиц** пьеса геройҙары ысынбарлыҡтан алып яҙылған **4.** *что*; *спец.* иҫәптән сығарыу, сығымға ебәреү; **списа́ть ты́сячу рубле́й** мең һумды иҫәптән сығарыу **5.** *кого*; *мор.* хеҙмәттән бушатыу (*экипаждан сығарыу*)

**СПИСА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *с кем-чем* яҙышыу, хат алышыу; **списа́ться с дру́гом** дуҫ менән хат алышыу **2.** *мор.* хеҙмәттән бушаныу (*экипаждан сығыу*); **списа́ться с корабля́** карап хеҙмәтенән бушаныу

**СПИ́СОК** *м* **1.** исемлек, теҙем; **спи́сок избира́телей** һайлаусылар исемлеге **2.** (*копия*) күсермә; **спи́ски родосло́вной** шәжәрә күсермәләре

**СПИ́СЫВАНИЕ** *с см.* **спи́сывать**

**СПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **списа́ть**

**СПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **списа́ться** **2.** *страд. от* **спи́сывать**

**СПИТО́Й,** -ая, -ое *разг.* шыйыҡ, эсә-эсә шыйыҡланған; **спито́й чай** шыйыҡ сәй

**СПИ́ТЬСЯ** *сов.* эсеүгә бирелеү, эскегә (эскелеккә) һабышыу

**СПИ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **спихну́ть**

**СПИХНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *разг.* этеп (төртөп) төшөрөү (ебәреү); **спихну́ть с ме́ста** урындан этеп ебәреү **2.** *перен., прост.* ебәреп (биреп) ҡотолоу; **спихну́ть за́муж** кейәүгә биреп ҡотолоу

**СПИ́ЦА** *ж* **1.** (*для вязания*) энә; **вяза́ть носки́ на спи́цах** энә менән ойоҡбаш бәйләү **2.** (*в колесе*) тырнаҡ, араса; **велосипе́дная спи́ца** велосипед арасаһы **3.** (*стержень*) теш; **спи́ца ве́шалки** элгес теше ♦ **после́дняя спи́ца в колесни́це** *кто* кәрәкле кишер япрағы (*әһәмиәтһеҙлекте көсәйткәндә әйтелә*)

**СПИЧ** *м* ҡотлау телмәре (*берәй тантанала әйтелгән*)

**СПИ́ЧЕЧНИЦА** *ж* шырпы ҡабы өсөн тартма

**СПИ́ЧЕЧНЫЙ,** -ая, -ое шырпы …ы; **спи́чечная коро́бка** шырпы ҡабы

**СПИ́ЧКА** *ж* шырпы; **заже́чь спи́чку** шырпы ҡабыҙыу ♦ **как спи́чка** таяҡ кеүек (*үтә ябыҡ кешегә ҡарата*)

**СПЛАВ I** *м* (*смесь*) иретмә; **сплав ме́ди с зо́лотом** баҡыр менән алтын иретмәһе

**СПЛАВ II** *м см.* **спла́вить** II – **сплавля́ть** II 1; **сплав брёвен** бүрәнә ҡыуыу

**СПЛА́ВИТЬ I** *сов. что* иретмә яһау, ҡушып иретеү (*металды*)

**СПЛА́ВИТЬ II** *сов.* **1.** *что* ҡыуыу, ағыҙыу, һаллау (*ағас*); **спла́вить лес** ағас ағыҙыу **2.** *кого-что*; *перен., прост.* ебәреп (оҙатып) ҡотолоу, биреп ҡотолоу (*уңайһыҙлыҡ тыуҙырған кешенән, кәрәкмәгән нәмәнән*)

**СПЛА́ВИТЬСЯ** *сов.* иреп ҡушылыу (*металл*)

**СПЛА́ВКА I** *ж*; *разг. см.* **спла́вить** I – **сплавля́ть** I; **спла́вка мета́ллов** металдарҙы ҡушып иретеү

**СПЛА́ВКА II** *ж*; *разг. см.* **спла́вить** II 1 – **сплавля́ть** II 1; **спла́вка плото́в** һал ҡыуыу

**СПЛАВЛЯ́ТЬ I** *несов. см.* **спла́вить** I

**СПЛАВЛЯ́ТЬ II** *несов. см.* **спла́вить** II

**СПЛАВЛЯ́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **спла́виться** **2.** *страд. от* **сплавля́ть** I

**СПЛАВЛЯ́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **сплавля́ть** II

**СПЛАВНО́Й,** -ая, -ое **1.** һал ...ы, һаллыҡ; **сплавно́й лес** һаллыҡ ағас **2.** һал ағыҙыу ...ы; **сплавна́я конто́ра** һал ағыҙыу контораһы

**СПЛА́ВЩИК** *м* ҡыуғынсы, һалсы

**СПЛАНИ́РОВАТЬ I** *сов. см.* **плани́ровать** I; **сплани́ровать рабо́ту** эш планлаштырыу

**СПЛАНИ́РОВАТЬ II** *сов. см.* **плани́ровать** II

**СПЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **сплоти́ть**

**СПЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сплоти́ться** **2.** *страд. от* **спла́чивать**

**СПЛЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **сплю́нуть**

**СПЛЕСНУ́ТЬ** *сов. что*; *прост.* һирпеп алыу, сайҡатыу; **сплесну́ть лицо́** биткә һыу һирпеп алыу ♦ **сплесну́ть рука́ми** *см.* **всплесну́ть**

**СПЛЕСТИ́** *сов. что* **1.** үреү, үреп яһау; **сплести́ корзи́ну** кәрзин үреү **2.** бәйләү; **сплести́ кру́жево** селтәр бәйләү **3.** ҡушып үреү, үреп ялғау (тоташтырыу); **сплести́ ле́нты** таҫмалар ҡушып үреү **4.** *перен.* бәйләү, ҡушыу

**СПЛЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** уралыу, сырмалыу, үрелеү, ишелеү; **ко́рни де́рева сплели́сь** ағас тамырҙары ишелгән **2.** *перен.* бәйләнеү, бергә ҡушылыу; **интере́сы сплели́сь** мәнфәғәттәр бергә ҡушылды; **на́ши су́дьбы сплели́сь** беҙҙең яҙмыштар бәйләнде

**СПЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **сплести́**

**СПЛЕТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сплести́сь** **2.** *страд. от* **сплета́ть**

**СПЛЕТЕ́НИЕ** *с* **1.** см. **сплести́**, **сплести́сь** **2.** үрелмә, уралма; **сплете́ние ветве́й** ботаҡтар үрелмәһе

**СПЛЕ́ТНИК** *м* и **СПЛЕ́ТНИЦА** *ж* ғәйбәтсе, ғәйбәт һатыусы

**СПЛЕ́ТНИЧАТЬ** *несов.* ғәйбәт һатыу (һөйләү), һүҙ йөрөтөү

**СПЛЕ́ТНЯ** *ж* ғәйбәт; **пусти́ть спле́тню** ғәйбәт таратыу

**СПЛЕЧА́** *нареч.* **1.** киҙәнеп, һелтәнеп; **руби́ть сплеча́** ныҡ һелтәнеп сабыу **2.** *перен.* уйлап тормай, дыуамаллыҡ менән; **реши́ть сплеча́** уйлап тормай хәл итеү

**СПЛОТИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *спец.* (*доски, брёвна*) нығытыу, бер-береһенә беркетеү, ҡыҫыу; **сплоти́ть пол** иҙәнде ҡыҫыу **2.** (*сбить в плоты*) һаллау, һалға бәйләү **3.** (*сомкнуть*) ҡыҫыу, тығыҙлап ҡуйыу; **сплоти́ть ряды́ демонстра́нтов** демонстранттарҙы рәттәргә тығыҙлап ҡуйыу **4.** *перен.* берләштереү, туплау, ойоштороу; **сплоти́ть трудя́щихся** хеҙмәтсәндәрҙе берләштереү

**СПЛОТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*сомкнуться*) тығыҙланыу, ҡыҫылыу, тартылыу; **ряды́ сплоти́лись** сафтар тығыҙланды **2.** *перен.* берләшеү, тупланыу, ойошоу; **това́рищество сплоти́тся** ширҡәт ойошор

**СПЛО́ТОК** *м*; *спец.* бәйләм, беркетмә (*бүрәнәләр, таҡталар*)

**СПЛОХОВА́ТЬ** *сов.*; *разг.* хата ебәреү (яһау), яңылышлыҡ эшләп ташлау

**СПЛОЧЕ́НИЕ** *с см.* **сплоти́ть** 3, 4, **сплоти́ться**; **сплоче́ние коллекти́ва** коллективты берләштереү

**СПЛОЧЁННОСТЬ** *ж* берҙәмлек, тупланғанлыҡ, ойошҡанлыҡ; **на́ша си́ла в сплочённости** беҙҙең көс берҙәмлектә

**СПЛОЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сплоти́ть** **2.** *прил.* берҙәм, тупланған, ойошҡан; **сплочённый коллекти́в** берҙәм коллектив

**СПЛОШНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*непрерывный*) тотош, өҙлөкһөҙ; **сплошно́й лес** тотош урман; **сплошно́й пото́к льда** өҙлөкһөҙ боҙ ағышы **2.** (*распространяющийся на всё, всех*) тотош, тоташлай; **сплошна́я гра́мотность** тотош грамоталылыҡ **3.** *разг.* (*совершенный, законченный*) бөтөнләй, тотошлайы менән, тулыһынса; **сплошна́я чепуха́** бөтөнләй буш (һүҙ)

**СПЛОШЬ** *нареч.* **1.** тоташтан, өҙлөкһөҙ; **сплошь иду́т дожди́** өҙлөкһөҙ ямғыр яуа **2.** (*целиком*) тотош, тулыһынса, баштан-аяҡ; **зерно́ сплошь отбо́рное** иген тотош яҡшы ♦ **сплошь и (да) ря́дом** бик йыш, бик күп, гел генә тиерлек, аҙым һайын

**СПЛУТОВА́ТЬ** *сов.*; *разг.* алдашыу, мутлашыу, хәйләләү

**СПЛЫВА́ТЬ** *несов. см.* **сплы́ть**

**СПЛЫВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **сплы́ться**

**СПЛЫТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** ағып китеү (төшөү); **льди́ны сплы́ли** боҙ киҫәктәре ағып киткән **2.** (*стечь*) ағып сығыу (түгелеү); (*перелиться через край*) ташып ағыу ♦ **был (была́, бы́ло) да сплыл (сплыла́, сплы́ло)** бөттө-китте юғалды, үтте лә бөттө, эҙе лә юҡ, елдәр иҫкән

**СПЛЫ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** йөҙөп килеү, йөҙөп килеп йыйылыу; **брёвна сплыли́сь** бүрәнәләр йөҙөп килеп йыйылған **2.** йәйелеү, ян-яҡҡа таралыу, ҡушылып бөтөү; **кра́ски сплы́лись** буяуҙар йәйелгән

**СПЛЮ́НУТЬ** *сов.* төкөрөү; **сплю́нуть слюну́** шайыҡты төкөрөү

**СПЛЮ́СНУТЬ** *сов.*; *разг. см.* **сплю́щить**

**СПЛЮ́СНУТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **сплю́щиться**

**СПЛЮ́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **сплю́щить**

**СПЛЮ́ЩИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сплю́щиться** **2.** *страд. от* **сплю́щивать**

**СПЛЮ́ЩИТЬ** *сов. что* йәмшәйтеү, ялпаҡлау, ҡыҫып (сукеп) йәнсеү

**СПЛЮ́ЩИТЬСЯ** *сов.* йәмшәйеү, ялпаҡланыу, йәнселеү; **консе́рвная ба́нка сплю́щилась** консерва банкаһы йәмшәйгән

**СПЛЯСА́ТЬ** *сов. см.* **пляса́ть**

**СПОДВИ́ЖНИК** *м* и **СПОДВИ́ЖНИЦА** *ж* көрәштәш, арҡалаш

**СПОЗАРА́НКУ** и **СПОЗАРА́НОК** *нареч.*; *разг.* таңдан, иртүк, таң менән; **встать спозара́нку** таңдан тороу

**СПОИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *прост.* эсереү; **спои́ть коро́ве ведро́ воды́** һыйырға бер биҙрә һыу эсереү **2.** *разг.* (*напоить допьяна*) эсереп иҫертеү, иҫерткәнсе эсереү **3.** *разг.* (*сделать пьяницей*) араҡы эсергә (эскегә) өйрәтеү

**СПОКО́ЙНО 1.** *нареч.* тыныс ҡына, тын ғына; **спать споко́йно** тыныс ҡына йоҡлау; **жить споко́йно** тыныс ҡына йәшәү **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* тыныс; **здесь споко́йно** бында тыныс; **на душе́ споко́йно** күңел тыныс

**СПОКО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неподвижный*) тын, тымыҙыҡ, тымыҡ; **споко́йное мо́ре** тымыҡ диңгеҙ; **споко́йная у́лица** тын урам **2.** *в разн. знач.* тыныс, сабыр; **споко́йный челове́к** сабыр кеше; **споко́йный сон** тыныс йоҡо; **споко́йная жизнь** тыныс тормош **3.** *разг.* (*удобный*) уңайлы, яйлы; **споко́йная о́бувь** яйлы аяҡ кейеме **4.** (*не раздражающий — о цвете, свете*) һүрәле, баҙыҡ (сағыу) булмаған, йомшаҡ; **споко́йный цвет мо́ря** диңгеҙҙең йомшаҡ төҫө ♦ **со споко́йной со́вестью** *см.* **со́весть**; **споко́йной но́чи!** тыныс йоҡо!

**СПОКО́ЙСТВИЕ** *с* **1.** (*покой*) тынлыҡ, һиллек; **установи́лось споко́йствие** тынлыҡ урынлашты **2.** (*душевное равновесие*) тыныслыҡ, тынғылыҡ; **утра́тить споко́йствие** тынғылыҡ юғалтыу

**СПОЛА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **сполосну́ть**

**СПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **сползти́**

**СПОЛЗА́ТЬСЯ** *несов. см.* **сползти́сь**

**СПОЛЗТИ́** *сов.* **1.** шыуышып төшөү; **сползти́ с горы́** тауҙан шыуышып төшөү **2.** шыуып төшөү (китеү); **одея́ло сползло́** юрған (өҫтән) шыуып төшкән

**СПОЛЗТИ́СЬ** *сов.* шыуышып (үрмәләп) килеп йыйылыу (тупланыу); **зме́и сползли́сь в я́му** йыландар соҡорға шыуышып килеп йыйылған

**СПОЛНА́** *нареч.* тулыһынса, тулы; **получи́ть пла́ту сполна́** түләүҙе тулыһынса алыу

**СПОЛОСНУ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* сайҡап алыу (ҡуйыу), сайып ҡуйыу

**СПОНТА́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* үҙлегенән, үҙенән-үҙе, үҙ алдына; **спонта́нное броже́ние** үҙенән-үҙе әсеү

**СПОР** *м* **1.** бәхәс, һүҙ көрәштереү; **нау́чный спор** ғилми бәхәс **2.** дау, тауыш, талаш-тартыш; **спор ме́жду сосе́дями** күршеләр араһындағы талаш-тартыш **3.** дәғүә, низағ; **спор о насле́дстве** мираҫ тураһында дәғүә ♦ **вне спо́ра** бәхәсһеҙ, тик шулай; **на спор** бәхәстән; **спо́ру нет** *вводн. сл.* шикһеҙ, икеләнеүһеҙ

**СПО́РИТЬ** *несов.* **1.** бәхәсләшеү, һүҙ көрәштереү, еңешеү; **спо́рить об иску́сстве** сәнғәт тураһында бәхәсләшеү **2.** (*в суде*) дәғүәләшеү, низағлашыу **3.** *разг.* (*держать пари*) бәхәсләшеү **4.** көрәшеү, ҡаршылашыу; **спо́рить с судьбо́й** яҙмыш менән көрәшеү

**СПОРИ́ТЬСЯ** и **СПО́РИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* ырау, уңыу, алға барыу; **рабо́та спори́тся** эш ырай

**СПО́РНОСТЬ** *ж* бәхәслелек; **спо́рность вы́водов** һығымталарҙың бәхәслелеге

**СПО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бәхәсле; **спо́рный вопро́с** бәхәсле мәсьәлә **2.** дәғүәле, низағлы; **спо́рное де́ло** низағлы эш

**СПОРОВИКИ́** *мн.* (*ед.* **споровик** *м*); *зоол.* споралылар, саң-һеркәлеләр (*бер күҙәнәкле ябай организмдар-паразиттар; кешелә һәм хайуандарҙа төрлө ауырыу тыуҙыра*)

**СПО́РОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** споралы, саң-һеркәле; **спо́ровые расте́ния** споралы үҫемлектәр **2.** спора ярҙамында, саң-һеркә ярҙамында; **спо́ровое размноже́ние** саң-һеркә ярҙамында үрсеү

**СПО́РОК** *м* һүтеп алынған тышлыҡ (*өҫ кейемендәге*)

**СПОРО́ТЬ** *сов. что* һүтеп (һыҙырып) алыу

**СПОРО́ТЬСЯ** *сов.* һүтелеү

**СПОРТ** *м* спорт; **лы́жный спорт** саңғы спорты; **занима́ться спо́ртом** спорт менән шөғөлләнеү

**СПОРТ...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "спорт" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **спортплоща́дка** спорт майҙаны; **спорттова́ры** спорт тауарҙары

**СПОРТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое спорт ...ы; **спорти́вный зал** спорт залы; **спорти́вные и́гры** спорт уйындары ♦ **из спорти́вного интере́са**: 1) үҙ һәләтеңде тикшереп ҡарау өсөн генә; 2) былай ғына, эш юҡлыҡтан (*ниҙер эшләү*)

**СПОРТСМЕ́Н** *м* и **СПОРТСМЕ́НКА** *ж* спортсы; **выдаю́щийся спортсме́н** атаҡлы спортсы

**СПОРХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** пырр итеп осоп китеү; **воробе́й спорхну́л с ве́тки** турғай ботаҡтан пырр итеп осоп китте **2.** *перен.* йүгереп китеү, елп итеп төшөү

**СПО́РЩИК** *м* и **СПО́РЩИЦА** *ж* бәхәссе, бәхәсләшергә яратыусы кеше

**СПО́РЫ** *мн.* (*ед.* **спо́ра** *ж*); *биол.* саң-һеркәләр, споралар (*бәшмәк, ылымыҡ һәм мүктәрҙең*)

**СПО́РЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** ырамлы, етеҙ; **спо́рая рабо́та** ырамлы эш; **спо́рые шаги́** етеҙ аҙымдар **2.** уңышлы, үрсемле; **спо́рые дро́жжи** уңышлы сүпрә

**СПОРЫНЬЯ́** *ж* ата арыш (*бәшмәк ауырыуы*)

**СПО́СОБ** *м* ысул, алым, юл; **спо́соб изготовле́ния бума́ги** ҡағыҙ эшләү ысулы; **любы́м спо́собом** ниндәй юл менән булһа ла; **найти́ спо́соб** юлын табыу

**СПОСО́БНОСТЬ** *ж* **1.** һәләт; **мысли́тельная спосо́бность** фекер йөрөтөү һәләте; **спосо́бность дви́гаться** хәрәкәтләнеү һәләте **2.** мөмкинлек, һәләт; **покупа́тельная спосо́бность населе́ния** халыҡтың һатып алыу мөмкинлеге **3.** *обычно мн.*

**спосо́бности** һәләтлек, һәләт, булдыҡлылыҡ; **музыка́льные спосо́бности** музыкаль һәләтлек; **прояви́ть спосо́бности** һәләтлек күрһәтеү

**СПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һәләтле; **спосо́бный учени́к** һәләтле уҡыусы **2.** булдыҡлы, булған, һәләтле, булдыра (тота һ.б.) алған; **спосо́бный к труду́** хеҙмәткә һәләтле; **спосо́бный носи́ть ору́жие** ҡорал тота алған

**СПОСО́БСТВОВАТЬ** *несов. кому-чему* булышыу, булышлыҡ (ярҙам) итеү; **спосо́бствовать успе́ху** уңышҡа булышлыҡ итеү

**СПОТКНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һөрлөгөү, һөрөнөү, абыныу; **споткну́ться о поро́г** тупһаға һөрөнөү **2.** *перен.*, *разг.* туҡтап ҡалыу, тотлоғоу; **споткну́ться на тру́дном сло́ве** ауыр һүҙҙә туҡтап ҡалыу **3.** *перен.*, *разг.* хаталаныу, һөрлөгөү (*тормошта, эштә*)

**СПОТЫКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **споткну́ться**, **спотыкну́ться 2.** абына-һөрлөгә атлау (барыу)

**СПОТЫКНУ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **споткну́ться**

**СПОХВАТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡапыл иҫкә килеү (төшөрөү), иҫкә төшөрөп өлгөрөү, абайлап (һиҙеп) алыу; **во́время спохвати́ться** ваҡытында һиҙеп алыу

**СПОХВА́ТЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **спохвати́ться**

**СПРА́ВА** *нареч.* (*где*) уңда, уң яҡта; (*откуда*) уңдан, уң яҡтан; **спра́ва от до́ма** өйҙән уң яҡта; **писа́ть спра́ва нале́во** уңдан һулға табан яҙыу

**СПРАВЕДЛИ́ВОСТЬ** *ж* **1.** ғәҙеллек; **справедли́вость реше́ния** ҡарарҙың ғәҙеллеге; **призна́ть справедли́вость зако́на** закондың ғәҙеллеген таныу **2.** хаҡлыҡ, дөрөҫлөк; **боро́ться за справедли́вость** хаҡлыҡ өсөн көрәшеү

**СПРАВЕДЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғәҙел; **справедли́вые зако́ны** ғәҙел закондар; **справедли́вый челове́к** ғәҙел кеше **2.** хаҡлы, нигеҙле, урынлы; **справедли́вые тре́бования** урынлы талаптар **3.** хаҡлы, хаҡ, дөрөҫ; **справедли́вое сужде́ние** дөрөҫ фекер ♦ **справедли́вые во́йны** ғәҙел һуғыштар (*милли азатлыҡ өсөн*)

**СПРА́ВИТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* байрам итеү, үткәреү, уҙғарыу, билдәләп үтеү; **спра́вить день рожде́ния** тыуған көндө билдәләп үтеү **2.** *прост.* һатып алыу, булдырыу, яһатыу, тектереү; **спра́вить костю́м** костюм һатып алыу

**СПРА́ВИТЬСЯ** *сов.* **1.** *с чем* үтәү, үтәй алыу, булдырыу, башҡарыу, башҡарып сығыу; **спра́виться с рабо́той** эште үтәй алыу **2.** *с кем-чем* еңеү, еңеп сығыу, еңә алыу; **спра́виться с боле́знью** ауырыуҙы еңеп сығыу; **спра́виться с хулига́ном** хулигандарҙы еңеү **3.** *о ком-чём* белешеү, һорашыу, мәғлүмәт һорау; **спра́виться о здоро́вье** һаулыҡ тураһында һорашыу ♦ **спра́виться с собо́й** үҙеңде ҡулға алыу, тынысланыу

**СПРА́ВКА** *ж* **1.** *см.* **спра́виться** – **справля́ться** 3; **2.** (*сведение*) мәғлүмәт; **стол спра́вок** мәғлүмәттәр өҫтәле **3.** (*документ*) белешмә, справка; **спра́вка о зарпла́те** эш хаҡы тураһында белешмә

**СПРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **спра́вить**

**СПРАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **спра́виться 2.** *страд. от* **справля́ть**

**СПРА́ВОЧНИК** *м* справочник, белешмә, белешмә китабы

**СПРА́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое белешмәләр ...ы, белешмә; **спра́вочное бюро́** белешмәләр бюроһы

**СПРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **спроси́ть**

**СПРА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **спроси́ться 2.** *страд. от* **спра́шивать**

**СПРЕССОВА́ТЬ** *сов. что* преслау, ҡыҫыу, баҫырыу; **спрессова́ть се́но** бесән преслау

**СПРЕССОВА́ТЬСЯ** *сов.* (*уплотниться в результате прессования*) пресланыу, ҡыҫылыу; (*слежаться*) баҫылыу, баҫып ҡыҫылыу, баҫырылыу

**СПРЕССО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **спрессова́ть**

**СПРЕССО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **спрессова́ться 2.** *страд. от* **спрессо́вывать**

**СПРИНТ** *м* спринт (*яҡын араға йүгереү, йөҙөү*)

**СПРИ́НТЕР** *м* спринтер

**СПРИНЦЕВА́ТЬ** *несов. кого-что* һиптереп йыуыу (йыуҙырыу); **спринцева́ть ра́ну** яраны һиптереп йыуыу

**СПРИНЦЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һиптереп йыуҙырылыу (йыуылыу) **2.** *страд. от* **спринцева́ть**

**СПРИНЦО́ВКА** *ж* (*прибор*) спринцовка, һиптергес (*дарыу, һыу бөрккөс*)

**СПРОВА́ДИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* оҙатып (ебәреп) ҡотолоу

**СПРОВА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **спрова́дить**

**СПРОВОЦИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **провоци́ровать**; **спровоци́ровать на вооружённое выступле́ние** ҡоралды сығышҡа ҡотҡо һалыу

**СПРОЕКТИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **проекти́ровать**

**СПРОС** *м* **1.** *прост. см.* **спроси́ть** – **спра́шивать** 1, 2; **2.** һорау, ихтыяж; **спрос на кни́ги** китапҡа ихтыяж; **спрос и предложе́ние** һорау һәм тәҡдим **3.** *разг.* талап; **с руководи́теля осо́бый спрос** етәксенән айырым талап ♦ **без спро́са (спро́су)** һорап тормай, рөхсәтһеҙ

**СПРОСИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого, у кого, что, о чём* һорау, һорашыу, һорап белеү; **спроси́ть о здоро́вье** һаулығы тураһында һорашыу; **спроси́ть фами́лию** фамилия һорау **2.** *что, чего* (*попросить*) һорау, үтенеү; **спроси́ть сове́та** кәңәш һорау; **спроси́ть де́нег** аҡса һорау **3.** *с кого* (*потребовать ответа*) яуап талап итеү, һорау

**СПРОСИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*попросить разрешения*) һорау, рөхсәт һорау **2.** *с кого безл.*; *разг.* һорау, талап итеү; **за э́то с нас спро́сится** быны өсөн беҙҙән һорарҙар **3.** *уст. см.* **спроси́ть** 1, 2

**СПРОСО́НОК** *нареч.*; *разг.* йоҡо аралаш, уяныр-уянмаҫ, уяулы-йоҡоло килеш

**СПРОСТА́** *нареч.*; *разг.* **1.** (*по доверчивости*) артыҡ ышанып, бер ҡатлылыҡ менән **2.** (*без умысла*) былай ғына, тиктомалға, артыҡ уйлап тормай, һис бер сәбәпһеҙ, буштан-бушҡа; **спроси́ть спроста́** былай ғына һорау

**СПРУТ** *м* һигеҙаяҡ, спрут

**СПРЫ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **спры́гнуть**

**СПРЫ́ГНУТЬ** *сов.* һикереү, һикереп төшөү; **спры́гнуть с кры́ши** ҡыйыҡтан һикереп төшөү

**СПРЫ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **спры́снуть**

**СПРЫ́СНУТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (һыу) бөркөү, бөркөп еүешләү; **спры́снуть цветы́** сәскәләргә һыу бөркөү **2.** *перен.*, *шутл.* йыуыу, һелтәп алыу (*ниҙелер эске менән билдәләү*); **спры́снуть сде́лку** килешеүҙе йыуыу

**СПРЯГА́ТЬ** *несов. что*; *грам.* зат, заман, һан менән үҙгәртеү; **спряга́ть глаго́л** ҡылымды зат, заман, һан менән үҙгәртеү

**СПРЯГА́ТЬСЯ** *несов.*; *грам.* **1.** зат, заман, һан менән үҙгәреү **2.** *страд. от* **спряга́ть**

**СПРЯЖЕ́НИЕ** *с*; *грам.* **1.** *см.* **спряга́ть 2.** зат, заман, һан менән үҙгәреш

**СПРЯСТЬ** *сов. см.* **прясть**

**СПРЯ́ТАТЬ** *сов. см.* **пря́тать**

**СПРЯ́ТАТЬСЯ** *сов. см.* **пря́таться**; **спря́таться от пресле́дователей** эҙәрләүселәрҙән йәшенеү

**СПУ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **спугну́ть**

**СПУГНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡурҡытыу, өркөтөү, ҡурҡытып ебәреү (осороу, ҡасырыу); **спугну́ть птиц** ҡоштарҙы ҡурҡытып осороу **2.** *перен.* ҡурҡытыу, һиҫкәндереү; **спугну́ть собесе́дника** әңгәмәләшеүсене һиҫкәндереү

**СПУД: из-под спу́да (извле́чь, вы́нуть и т.п.)** *уст.* файҙаланылмай ятҡан (онотолған) ерҙән эшкә индереү; **под спу́дом (лежа́ть, держа́ть и т.п.)** ҡулланылмай (файҙаланылмай) ятыу (тотоу)

**СПУСК** *м* **1.** *см.* **спусти́ть** — **спуска́ть** 1, 6, **спусти́ться** — **спуска́ться** 1, 2; **спуск корабля́ на́ воду** карапты һыуға төшөрөү; **спуск фла́га** флагты төшөрөү **2.** төшөү юлы (урыны); **спуск к реке́** йылғаға төшөү юлы **3.** (*крючок в оружии*) саҡма **4.** *полигр.* (*пробел в верхней части страницы*) буш урын ♦ **не дава́ть (не дать) спу́ска (спу́ску)** ҡаты тотоу, йомшаҡлыҡҡа урын ҡалдырмау

**СПУСКА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **спуска́ть** ♦ **спуска́емый аппара́т** төшөрөлә торған аппарат

**СПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **спусти́ть** ♦ **не спуска́ть глаз** *с кого-чего*: 1) (*любоваться*) күҙҙе алмау, һоҡланып ҡарап тороу; 2) (*не упускать из виду*) күҙҙән ысҡындырмау

**СПУСКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **спусти́ться 2.** ипкен (һарҡыу) булыу, төшөү (*ер, яр һ.б. урын тураһында*) **3.** төшөү, төшөп (һалынып) тороу; **во́лосы у него́ спуска́ются на щёки** уның сәстәре сикәһенә төшөп тора **4.** *страд. от* **спуска́ть**

**СПУСКНО́Й,** -ая, -ое (аҫҡа) төшә (төшөрә, ағыҙа) торған; **спускно́й кран** ағыҙа торған һемәк

**СПУСКОВО́Й,** -ая, -ое ысҡындырғыс, ысҡындырып ебәрә торған; **спусково́й механи́зм** ысҡындырғыс механизм

**СПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* төшөрөү, төшөрөп ебәреү; **спусти́ть ведро́ в коло́дец** биҙрәне ҡоҙоҡҡа төшөрөп ебәреү; **спусти́ть за́навес** ҡорманы төшөрөү; **спусти́ть чулки́** ойоҡто төшөрөү **2.** *что* (*сплавить по течению*) ағыҙыу; **спусти́ть лес** ағас ағыҙыу **3.** *что* ебәреү, төшөрөү; **спусти́ть директи́ву** директива ебәреү **4.** *что* (*пустить на воду — о судне*) һыуға төшөрөү, йөҙҙөрөп ебәреү; **спусти́ть парохо́д** пароходты һыуға төшөрөү **5.** *кого-что* ысҡындырыу, ысҡындырып ебәреү; **спусти́ть куро́к** тәтене ысҡындырыу; **спусти́ть соба́ку** этте (бәйҙән) ысҡындырыу **6.** *что* ағыҙыу, сығарыу (*һыу, газ, һауа һ.б.*); **спусти́ть во́ду из бо́чки** мискәнең һыуын ағыҙыу; **спусти́ть пар** пар сығарыу **7.** *что* кәметеү, төшөрөү; **спусти́ть у́ровень воды́** һыу кимәлен кәметеү **8.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*дать поблажку*) (иғтибарһыҙ) үткәреп ебәреү, әһәмиәт бирмәү; **не спусти́ть ребёнку гру́бость** баланың тупаҫлығын иғтибарһыҙ үткәреп ебәрмәү **9.** *что*; *прост.* һатыу, атҡарыу; **спусти́ть чужу́ю вещь** кеше нәмәһен һатып ебәреү **10.** *что*; *разг.* (*растратить*) елгә осороу, сарыф итеү ♦ **спусти́ть на тормоза́х** шау-шыуһыҙ ғына хәл итеү (үткәреп ебәреү); **спусти́ть шку́ру (три шку́ры, семь шкур)** *прост.* һырт ҡайышын алыу, һыҙырыу, ныҡ туҡмау; **спустя́ рукава́ (де́лать)** минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе; илкеһалҡы эшләү (башҡарыу)

**СПУСТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *в разн. знач.* төшөү; **спусти́ться с горы́** тауҙан төшөү; **спусти́ться по ле́стнице** баҫҡыс буйлап төшөү; **спусти́ться в по́греб** баҙға төшөү; **самолёт спусти́лся на аэродро́м** самолёт аэродромға төштө; **чуло́к спусти́лся** ойоҡ төшкән; **спусти́ться по реке́** йылға буйлап төшөү **2.** *перен.* төшөү, ятыу, ҡаплау; **темнота́ спусти́лась на зе́млю** ергә ҡараңғылыҡ ятты **3.** *перен.* (түбән) төшөү; **спусти́ться до униже́ния** хурлыҡҡа төшөү ♦ **спусти́ться с облако́в** күктән ергә төшөү (*хыялдар донъяһынан тормошҡа ҡайтыу*)

**СПУСТЯ́** *предлог с вин. п.* (*по прошествии какого-л. времени*) үткәс (уҙғас), -дан/-дән һуң; **спустя́ ме́сяц** бер айҙан һуң, бер ай үткәс

**СПУ́ТАТЬ** *сов.* **1.** *что* сыуалтыу, сейәлтеү, сеймәлтеү; **спу́тать ни́тки** еп сейәлтеү; **спу́тать во́лосы** сәсте сыуалтыу **2.** *что* бутау, буталдырыу, яңылыштырыу; **спу́тать страни́цы ру́кописи** ҡулъяҙманың биттәрен бутау; **спу́тать счёт** иҫәпте бутау **3.** *с кем-чем* и *без доп.* (*принять одно за другое*) бутау, буталау **4.** *кого*; *разг.* бутау, буталдырыу; **спу́тать допра́шиваемого** яуап биреүсене буталдырыу **5.** *кого-что* тышау, ты-



15 зак. 2.0007.06

шаулау, урау; **спу́тать коня́** ат тышау **6.** *кого-что* (*запутать, усложнить*) бутау, ҡатмарлаштырыу; **спу́тать де́ло** эште бутау ♦ **спу́тать ка́рты (пла́ны, расчёты)** *см.* **ка́рта**; **спу́тать по рука́м и нога́м** аяҡ-ҡулды бәйләү

**СПУ́ТАТЬСЯ** *сов.* **1.** сыуалыу, сейәлеү, сеймәлеү; **ни́тки спу́тались** ептәр сейәлгән **2.** буталыу, тәртип юғалыу; **ка́рты спу́тались** кәрттәр буталған **3.** (*сбиться*) яңылышыу, буталыу; **спу́таться в счёте** иҫәптә буталыу **4.** *перен.* буталыу, сыуалыу; **мы́сли спу́тались** фекерҙәр буталды

**СПУ́ТНИК** *м* **1.** юлдаш; **найти́ спу́тника** юлдаш табыу **2.** юлдаш, эйәрсән; **Луна́ — спу́тник Земли́** Ай — Ерҙең юлдашы **3.** *чего*; *перен.* юлдаш; **литерату́ра — спу́тник образо́ванности** әҙәбиәт — белемлелек юлдашы **4.** *см.* **иску́ственный спу́тник** ♦ **иску́сственный спу́тник** спутник, яһалма юлдаш, яһалма спутник; **спу́тник жи́зни** тормош иптәше (*ир*)

**СПУ́ТНИЦА** *ж см.* **спу́тник** 1, 3 ♦ **спу́тница жи́зни** тормош иптәше (*ҡатын*)

**СПУ́ТНИКОВЫЙ,** -ая, -ое спутник, спутник …ы; **спу́тниковая радиосвя́зь** спутник радио бәйләнеше

**СПУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **спу́тать**

**СПУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **спу́таться** **2.** *страд. от* **спу́тывать**

**СПЬЯ́НА** и **СПЬЯ́НУ** *нареч.*; *разг.* иҫерек баш менән, иҫерек килеш (хәлдә)

**СПЯ́ЧКА** *ж* **1.** (*у животных*) йоҡо, йоҡоға талыу; **зи́мняя спя́чка** ҡышҡы йоҡо **2.** *перен.* (*бездеятельность*) ғәфләт йоҡоһо, һүлпәнлек, вайымһыҙлыҡ, моңһоҙлоҡ, ялҡаулыҡ

**СПЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **спать** **2.** *в знач. сущ.* **спя́щий** *м* и **спя́щая** *ж* йоҡлаусы ♦ **спя́щие по́чки** *бот.* йоҡлаусы бөрөләр (*эшмәкәрлеген туҡтатҡан, экренәйткән бөрөләр*)

**СРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **сработать**

**СРАБА́ТЫВАТЬСЯ I** *несов. см.* **срабо́таться** I

**СРАБА́ТЫВАТЬСЯ II** *несов. см.* **срабо́таться** II

**СРАБО́ТАТЬ** *сов.* **1.** *что*; *прост.* (*сделать, изготовить*) эшләү, яһау **2.** (*о механизме*) хәрәкәткә килеү, эшләп китеү; **автома́т срабо́тал** автомат эшләп китте

**СРАБО́ТАТЬСЯ I** *сов.* эштән сығыу, туҙыу, яраҡһыҙ булыу; **стано́к срабо́тался** станок эштән сыҡҡан

**СРАБО́ТАТЬСЯ II** *сов.* (үҙ-ара) килешеп эшләү, татыу эшләп китеү; **мы с ним срабо́тались** беҙ уның менән килешеп эшләйбеҙ

**СРАВНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сравни́ть** **2.** сағыштырыу; **о́бразные сравне́ния** һынлы сағыштырыуҙар ♦ **сте́пени сравне́ния** *см.* **сте́пень**; **в сравне́нии (по сравне́нию)** *с кем-чем кем-нимә менән* сағыштырып ҡарағанда (сағыштырғанда); **сравне́ния нет (не мо́жет быть)** сағыштырыуы мөмкин түгел

**СРА́ВНИВАТЬ I** *несов. см.* **сравни́ть**

**СРА́ВНИВАТЬ II** *несов. см.* **сравня́ть**

**СРА́ВНИВАТЬ III** *несов. см.* **сровня́ть**

**СРА́ВНИВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **сра́внивать** I

**СРА́ВНИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **сра́внивать** II

**СРА́ВНИВАТЬСЯ III** *несов.* **1.** *см.* **сровня́ться** **2.** *страд. от* **сра́внивать** III

**СРАВНИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* сағыштырмаса; **сравни́тельно недо́лго** сағыштырмаса оҙаҡ түгел ♦ **сравни́тельно** *с кем-чем кем-нимә менән* сағыштырғанда, сағыштырып ҡарағанда

**СРАВНИ́ТЕЛЬНО-ИСТОРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сағыштырма-тарихи; **сравни́тельно-истори́ческий ме́тод иссле́дования** тикшереүҙең сағыштырма-тарихи ысулы

**СРАВНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сағыштырма; **сравни́тельная анато́мия** сағыштырма анатомия; **сравни́тельные све́дения** сағыштырма мәғлүмәттәр **2.** *грам.* сағыштырыу, сағыштырыу …ы; **сравни́тельные сою́зы** сағыштырыу теркәүестәре; **сравни́тельное прида́точное предложе́ние** сағыштырыу эйәрсән һөйләм **3.** (*относительный*) сағыштырмаса, ярайһы уҡ; **сравни́тельное зати́шье** сағыштырмаса тынлыҡ ♦ **сравни́тельная сте́пень** *грам.* сағыштырыу дәрәжәһе (*сифаттарҙа, рәүештәрҙә*)

**СРАВНИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*сопоставить*) сағыштырыу, сағыштырып ҡарау **2.** *с кем-чем* (*приравнять*) тиңләү, тиңәү, тиңләштереү

**СРАВНИ́ТЬСЯ** *сов. с кем-чем* тиңләшеү, тиңәшеү; **я не могу́ с ним сравни́ться** мин уға тиңәшә алмайым

**СРАВНЯ́ТЬ** *сов. кого-что* тигеҙләү, тиң итеү; **сравня́ть гра́ждан в права́х** граждандарҙың хоҡуҡтарын тиң итеү

**СРАВНЯ́ТЬСЯ** *сов.* тигеҙләшеү, тиңләшеү

**СРАЖА́ТЬ** *несов. см.* **срази́ть**

**СРАЖА́ТЬСЯ** *несов. см.* **срази́ться**

**СРАЖЕ́НИЕ** *с* **1.** (ҙур) һуғыш; **по́ле сраже́ния** һуғыш яланы; **вы́играть сраже́ние** һуғышта еңеп сығыу **2.** *перен.*; *разг.* алыш, көрәш; **сраже́ние за пра́вду** дөрөҫлөк өсөн көрәш

**СРАЗИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** атып (һуғып һ.б.) үлтереү; **срази́ть врага́ вы́стрелом** дошманды атып үлтереү **2.** *перен.* тетрәтеү, тетрәндереү, ғәжәпкә ҡалдырыу; **э́та весть меня́ срази́ла** был хәбәр мине тетрәндерҙе

**СРАЗИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һуғышыу, алышыу; **полки́ срази́лись** полктар һуғышты **2.** *перен.*, *разг.* алышыу, көрәшеү; **срази́ться в ша́хматы** шахматта алышыу

**СРА́ЗУ** *нареч.* **1.** (*в один приём*) бер юлы; **рассказа́л не сра́зу** бер юлы һөйләмәне **2.** (*одновременно*) тотош (бөтәһе) бергә; **все заговори́ли сра́зу** бөтәһе бер юлы һөйләй башланы **3.** (*немедленно*) шунда уҡ, шул уҡ ваҡытта; **отве́тить сра́зу** шунда уҡ яуап биреү

**СРАМ** *м*; *разг.* **1.** оятлыҡ, хурлыҡ; **испы́тывать срам** хурлыҡ кисереү; **како́й срам!** ниндәй оят! **2.** *в знач. сказ.* оят, хурлыҡ; **срам смотре́ть** ҡарауы оят

**СРАМИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *разг.* хур итеү, хурлыҡҡа төшөрөү, оятҡа ҡалдырыу; **срами́ть фами́лию** фамилияны хур итеү **2.** *прост.* хурлау, әрләү, һүгеү; **срами́ть при наро́де** халыҡ алдында хурлау

**СРАМИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* хурға (оятҡа) ҡалыу, хурланыу

**СРАМОТА́** *ж*; *прост.* **1.** оятлыҡ, хурлыҡ **2.** *в знач. сказ.* оят, хурлыҡ

**СРАСТА́НИЕ** *с см.* **сраста́ться**; **сраста́ние косте́й** һөйәктәрҙең ялғанып үҫеп китеүе

**СРАСТА́ТЬСЯ** *несов. см.* **срасти́сь**

**СРАСТИ́СЬ** *сов.* **1.** йәбешеп (берегеп, бергә ҡушылып) үҫеү (үҫеп китеү), тоташып үҫеү; **оре́хи сросли́сь** сәтләүектәр берегеп үҫкән **2.** (*о сломанной кости*) ялғаныу, берегеп үҫеү; **ко́сти сросли́сь** һөйәктәр ялғанған **3.** *перен.* (*соединиться*) берегеү, берегеп китеү; **мы́сли на́ши сросли́сь** беҙҙең уйҙар беректе

**СРАСТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*сломанную кость*) ялғау, ялғандырыу **2.** (*соединить концы края при сварке и т.п.*) беркетеү, ялғап ҡуйыу, тоташтырыу **3.** *перен.* тығыҙ бәйләнеү

**СРАЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **срасти́ть**, **срасти́сь** — **сраста́ться**; **сраще́ние краёв ра́ны** яра йөйҙәренең тоташып үҫеүе **2.** берлек; **фразеологи́ческое сраще́ние** фразеологик берлек

**СРА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **срасти́ть**

**СРА́ЩИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** ялғаныу, тоташыу; **при сва́рке тру́бы сра́щиваются** иретеп йәбештергәндә торбалар ялғана **2.** *страд. от* **сра́щивать**

**СРЕ́БРЕНИК** *м* боронғо ваҡ көмөш аҡса ♦ **за три́дцать сре́бреников прода́ть** утыҙ тингә һатып ебәреү (*аҡса өсөн кешене һатыу*)

**СРЕБРОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое көмөшлө, көмөшкә бай; **сребро́носная поро́да** көмөшкә бай тоҡом

**СРЕДА́ I** *ж* **1.** мөхит, тирә-яҡ, тирәлек; **географи́ческая среда́** географик мөхит; **пита́тельная среда́** аҙыҡлы мөхит **2.** мөхит, тирә-йүн, ара, әйләнә-тирә; **рабо́чая среда́** эшселәр араһы; **жить в интеллиге́нтной среде́** зыялылар мөхитендә йәшәү

**СРЕДА́ II** *ж* шаршамбы; **сего́дня среда́** бөгөн шаршамбы

**СРЕДИ́** и **СРЕДЬ** *предлог с род. п.* **1.** (*в середине, в центре чего-л.*; *в промежутке между концом и началом какого-л. временного отрезка*) уртаһында; **стоя́ть среди́ ко́мнаты** бүлмә уртаһында тороу; **просну́ться среди́ но́чи** төн уртаһында уяныу **2.** (*между, посреди, в окружении чего-л.*) араһында; **дом стои́т среди́ со́сен** өй ҡарағайҙар араһында тора; **среди́ родны́х** туғандар араһында ♦ **среди́ (средь) бе́ла дня** *см.* **бе́лый**

**СРЕДИ́НА** *ж см.* **середи́на**

**СРЕДИ́ННЫЙ,** -ая, -ое *см.* **середи́нный**

**СРЕ́ДНЕ** *нареч.* уртаса, бер сама; **учи́ться сре́дне** уртаса (ғына) уҡыу

**СРЕДНЕ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "урта", "уртаса" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **среднеазиа́тский** Урта Азия ...ы; **среднегодово́й** уртаса йыллыҡ

**СРЕДНЕВЕКО́ВЫЙ,** -ая, -ое урта быуат(тар) ...ы, урта быуаттарға хас; **средневеко́вый го́род** урта быуат ҡалаһы

**СРЕДНЕВЕКО́ВЬЕ** *с* Урта быуат(тар) (*боронғо тарихтан яңы тарихҡаса булған дәүер*); **иску́сство Средневеко́вья** Урта быуаттар сәнғәте

**СРЕ́ДНИЙ,** -яя, -ее **1.** урталағы, урта; **сре́днее окно́** урталағы тәҙрә; **сре́днее тече́ние реки́** йылғаның урта ағымы; **сре́дний ряд** урта рәт **2.** (*второй по возрасту из трёх детей*) уртансы; **сре́дний сын** уртансы ул **3.** *в разн. знач.* уртаса; **челове́к сре́днего ро́ста** уртаса буйлы кеше; **сре́дний вес** уртаса ауырлыҡ; **сре́дняя ско́рость поезда** поездың уртаса тиҙлеге; **сре́дний надо́й молока́** һөттөң уртаса һауымы **4.** (*посредственный*) урта ҡул, уртаса; **сре́дний учени́к** уртаса уҡыусы ♦ **в сре́днем** уртаса алғанда; **не́что сре́днее** тегеләй ҙә, былай ҙа түгел; **сре́дние века́** урта быуаттар; **сре́днее образова́ние** урта белем; **сре́дний па́лец** урта бармаҡ; **сре́дней руки́** урта ҡул, бер сама; **сре́днее у́хо** *анат.* урта ҡолаҡ; **сре́дних лет** *кто* урта йәштәрҙәге

**СРЕДОТО́ЧИЕ** *с* үҙәк, тупланыш; **средото́чие интеллиге́нции** зыялылар тупланышы

**СРЕ́ДСТВО** *с* **1.** сара, юл, әмәл; **сре́дство воспита́ния** тәрбиә сараһы **2.** *обычно мн.* **сре́дства** сара, средство; **сре́дства произво́дства** етештереү саралары; **сре́дства свя́зи** элемтә саралары; **техни́ческие сре́дства** техник саралар **3.** дарыу, им, дауалау сараһы (нәмәһе); **сре́дство от ка́шля** йүтәл дарыуы; **перевя́зочные сре́дства** яра бәйләү нәмәләре **4.** *мн.* **сре́дства** (*деньги*) аҡса, байлыҡ, мал-мөлкәт, средство; **оста́ться без средств** аҡсаһыҙ ҡалыу

**СРЕДЬ** *предлог см.* **среди́**

**СРЕЗ** *м* **1.** *спец. см.* **сре́зать** — **среза́ть** 1; **2.** (*место*) киҫем, ҡырҡым, киҫелеш; **срез на де́реве** ағастағы киҫем

**СРЕ́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡырҡып (киҫеп) алыу, ҡыйып (ҡырҡып) төшөрөү; **сре́зать ве́тку** ботаҡты ҡырҡып алыу **2.** *кого* үлтереү, ҡыйыу (*атып, шартлатып*); **вы́стрел сре́зал у́тку** атыу өйрәкте ҡыйҙы **3.** *что*; *перен.*, *разг.* ҡырҡыу, кәметеү; **сре́зать лими́ты** лимитты кәметеү **4.** *кого*; *перен.* (*оборвать чью-л. речь*) һүҙен бүлдереү, туҡтатыу **5.** *кого-что*; *разг.* (*на экзамене*) батырыу, ҡырҡыу, насар билдә ҡуйыу **6.** *что*; *спорт.* киҫеү, ҡыялатып тибеү (*тупты*)

**СРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **сре́зать**

**СРЕ́ЗАТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*на экзамене*) уңышһыҙлыҡҡа осрау, икеле алыу; **сре́заться на экза́-**



15*

**мене** имтиханда икеле алыу **2.** *прост.* (*вступить в спор*) әләгешеү, һүҙгә килешеү

**СРЕЗА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сре́заться** 1; **2.** *страд. от* **среза́ть**

**СРЕ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **сре́зать**

**СРИСОВА́ТЬ** *сов. что* күсереп һүрәт төшөрөү, һүрәтте күсереп яһау

**СРИСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **срисова́ть**

**СРОВНЯ́ТЬ** *сов. что* тигеҙләү; **сровня́ть я́му** соҡорҙо тигеҙләү ♦ **сровня́ть с землёй** ер менән тигеҙләү, емереп ташлау

**СРОВНЯ́ТЬСЯ** *сов. с кем-чем* **1.** (*стать ровным*) тигеҙләнеү **2.** (*двигаясь, оказаться рядом*) тапҡырына (тәңгәленә) килеп етеү

**СРОДНИ́** *нареч.*; *разг.* **1.** *кому* туған, ҡәрҙәш; **он дово́дится мне сродни́** ул миңә туған тейеш **2.** *чему*; *перен.* (*близко по характеру*) яҡын, күңелгә ятышлы

**СРОДНИ́ТЬ** *сов. кого* дуҫлаштырыу, яҡынлаштырыу, туғанлаштырыу; **нас сродни́ла о́бщность интере́сов** мәнфәғәттәр уртаҡлығы беҙҙе яҡынлаштырҙы

**СРОДНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *с кем-чем* (*стать близким*) дуҫлашыу, яҡынлашыу, туғанлашыу **2.** *с чем* (*привыкнуть*) эйәләшеп (өйрәнеп) китеү, күнегеү

**СРОДСТВО́** *с*; *книжн.* оҡшашлыҡ, яҡынлыҡ; **сродство́ хара́ктеров** холоҡтарҙың оҡшашлығы

**СРО́ДУ** *нареч.*; *прост.* (*с отрицанием* “*не*”) һис, һис бер, һис кенә лә, ғүмерҙә, бер ҙә; **сро́ду не ви́дел** һис кенә лә күргәнем юҡ

**СРОК** *м* ваҡыт, мәл, осор, срок; **испыта́тельный срок** һынау осоро; **срок слу́жбы в а́рмии** армияла хеҙмәт итеү ваҡыты; **назна́чить срок отъе́зда** китеү мәлен билдәләү; **прие́хать к сро́ку** ваҡытына ҡайтып етеү ♦ **в срок** ваҡытында; **на срок** билдәле бер ваҡытҡа; **да́й(те) срок** бер аҙ ваҡыт бир(егеҙ), ашыҡтырма(ғыҙ)

**СРО́СТОК** *м* ҡушылып (йәбешеп) үҫкән (*нәмә*), ҡуш (ҡушалы); **сро́сток алма́за** ҡушылып үҫкән алмас

**СРО́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** ашығыслыҡ, кисектергеһеҙлек; **сро́чность зака́за** заказдың ашығыслығы; **что за сро́чность!** ниндәй ашығыслыҡ ул! **2.** билдәле срокка бирелеү (һалыныу), ваҡыты билдәләнеү, сикләү; **сро́чность ссу́ды** ссуданың билдәле срокка бирелеүе

**СРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ашығыс, кисектергеһеҙ; **сро́чное де́ло** ашығыс эш; **сро́чные ме́ры** ашығыс саралар **2.** билдәле бер ваҡытҡа иҫәпләнгән, ваҡыт менән сикле, билдәле срокка һалынған (бирелгән); **сро́чный вклад** билдәле срокка һалынған аҡса

**СРУБ** *м* **1.** *см.* **сруби́ть** — **сруба́ть** 1; **2.** (*деревянное сооружение из нескольких венцов, скреплённых в форме четырёхугольника*) бура; **сруб до́ма** өй бураһы; **руби́ть сруб** бура бурау; **ста́вить сруб** бура күтәреү

**СРУБА́ТЬ** *несов. см.* **сруби́ть** 1, 2

**СРУБИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡырҡыу, ҡырҡып алыу, ҡырҡып ташлау, сабыу, сабып ташлау; **сруби́ть де́рево** ағас ҡырҡыу; **сруби́ть лес** урманды ҡырҡып ташлау **2.** сабыу, ватыу; **сруби́ть лёд** боҙҙо сабыу **3.** *см.* **руби́ть** 6; **сруби́ть дом** өй бурау

**СРЫВ** *м* **1.** *см.* **сорва́ть** — **срыва́ть** I 4—6, **сорва́ться** 1—3, 6, 8 — **срыва́ться** I; **2.** өҙөклөк, уңышһыҙлыҡ; **сры́вы в рабо́те** эштәге өҙөклөктәр **3.** (*обрыв*) ярлау

**СРЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **сорва́ть**

**СРЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **срыть**

**СРЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **сорва́ться** **2.** *страд. от* **срыва́ть** I

**СРЫВА́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **срыва́ть** II

**СРЫ́ВЩИК** *м* и **СРЫ́ВЩИЦА** *ж*; *прост.* эште өҙөүсе, эшкә аяҡ салыусы

**СРЫ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **срыгну́ть**

**СРЫГНУ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *разг.* кикереп кире сығарыу

**СРЫТЬ** *сов. что* **1.** ҡаҙып тигеҙләү (ташлау); **срыть бугоро́к** түмәләсте ҡаҙып тигеҙләү **2.** (*снести*) һүтеп (емереп) ташлау (*ҡоролманы*); **срыть земля́нку** ер өйҙө һүтеп ташлау

**ССА́ДИНА** *ж* һыҙырылған (ҡырҡылған, тырналған) урын, (бәләкәй генә) яра

**ССАДИ́ТЬ I** *сов. кого-что* төшөрөү, төшөрөп ҡалдырыу; **ссади́ть с по́езда** поездан төшөрөп ҡалдырыу

**ССАДИ́ТЬ II** *сов. что* һыҙыртыу, тырнатыу, ҡырҡтырыу

**ССА́ЖИВАТЬ I** *несов. см.* **ссади́ть** I

**ССА́ЖИВАТЬ II** *несов. см.* **ссади́ть** II

**ССЕК** *м* (*часть говяжьей туши*) бот ите

**ССЕКА́ТЬ** *несов. см.* **ссечь**

**ССЕЧЬ** *сов. что* сабып өҙөү (ташлау); **ссечь ве́тви де́рева** ағастың ботаҡтарын сабып ташлау

**ССО́РА** *ж* талаш, ыҙғыш, талаш-тартыш, ямանлашыу

**ССО́РИТЬ** *несов. кого* талаштырыу, ыҙғыштырыу, ямանлаштырыу, ара боҙоу

**ССО́РИТЬСЯ** *несов. с кем* талашыу, ыҙғышыу, ямանлашыу, боҙолошоу; **ссо́риться с сосе́дом** күрше менән ыҙғышыу

**ССО́ХНУТЬСЯ** *сов.* **1.** кибеү, кибеп ҡалтайыу (кәкрәйеү); **доска́ ссо́хлась** таҡта кибеп ҡалтайған **2.** кибеп ҡатыу; **гли́на ссо́хлась** балсыҡ кибеп ҡатҡан

**ССУ́ДА** *ж* ссуда, аҡсалата бурыс; **получи́ть ссу́ду** ссуда алыу; **погаше́ние ссу́ды** ссуданы ҡайтарыу

**ССУДИ́ТЬ** *сов. кого-что, кому, чем* бурысҡа биреп тороу, ссуда биреү

**ССУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое ссуда(лар) ...ы, ссуда биреү (алыу) ...ы; **ссу́дная ве́домость** ссудалар ведомосы; **ссу́дный банк** ссуда банкыһы

**ССУЖА́ТЬ** *несов. см.* **ссуди́ть**

**ССУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **ссучи́ть**

**ССУЧИ́ТЬ** *сов.* еп ҡатлау, (епте) ҡушып сиратыу

**ССЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **сосла́ть**

**ССЫЛА́ТЬСЯ I** *несов. страд. от* **ссыла́ть**

**ССЫЛА́ТЬСЯ II** *несов. см.* **сосла́ться**

**ССЫ́ЛКА I** *ж* **1.** *см.* **сосла́ть** — **ссыла́ть** **2.** һөргөн; **побыва́ть в ссы́лке** һөргөндә булыу

**ССЫ́ЛКА II** *ж* **1.** *см.* **сосла́ться** — **ссыла́ться** II; **2.** (*цитата*) тоҫҡама, һылтанма; **постра-ни́чные ссы́лки** биттәге һылтанмалар

**ССЫ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое һылтанма итеп килтерелгән; **ссы́лочные примеча́ния** һылтанма итеп килтерелгән иҫкәрмәләр

**ССЫ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һөргөнгә ебәрелгән, һөргөндә булған **2.** *в знач. сущ.* **ссы́льный** *м* и **ссы́льная** *ж* һөргөнсө, һөргөнгә ебәрелгән (һөргөндәге) кеше

**ССЫ́ПАТЬ** *сов. что* **1.** бушатыу, һалыу, тултырыу; **ссы́пать муку́ в я́щик** ондо әрйәгә бушатыу **2.** (*доставив куда-л., сдать*) тапшырыу; **ссы́пать зерно́ в элева́тор** игенде элеваторға тапшырыу

**ССЫПА́ТЬ** *несов. см.* **ссы́пать**

**ССЫ́ПАТЬСЯ** *сов.* ҡойолоу, ҡойолоп төшөү; **песо́к ссы́пался в я́му** ҡом соҡорға ҡойолдо

**ССЫПА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ссы́паться** **2.** *страд. от* **ссыпа́ть**

**ССЫ́ПКА** *ж см.* **ссы́пать** — **ссыпа́ть**; **ссы́пка зерна́** иген тапшырыу

**ССЫПНО́Й,** -ая, -ое тапшырыу ...ы; **ссыпно́й пункт** иген тапшырыу пункты

**ССЫХА́ТЬСЯ** *несов. см.* **ссо́хнуться**

**СТАБИЛИЗА́ТОР** *м*; *спец.* стабилизатор; **стабилиза́тор автомоби́ля** автомобилдең стабилизаторы; **стабилиза́тор напряже́ния** көсөргәнеш стабилизаторы

**СТАБИЛИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** стабиллек, стабилләшеү; **стабилиза́ция цен** хаҡтарҙың стабилләшеүе; **стабилиза́ция эконо́мики** иҡтисадтың стабилләшеүе **2.** *спец.* стабиль хәлдә тотоу (һаҡлау); **стабилиза́ция бензи́на** бензинды стабиль хәлдә һаҡлау

**СТАБИЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* тотороҡландырыу, стабилләштереү; **стабилизи́ровать валю́ту** валютаны тотороҡландырыу

**СТАБИЛИЗИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* тотороҡланыу, стабилләшеү **2.** *только несов. страд. от* **стабилизи́ровать**

**СТАБИЛИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. см.* **стабилизи́ровать**

**СТАБИЛИЗОВА́ТЬСЯ** **1.** *сов., несов. см.* **стабилизи́роваться** **2.** *только несов. страд. от* **стабилизова́ть**

**СТАБИ́ЛЬНОСТЬ** *ж* тотороҡлоҡ, стабиллек; **показа́тель стаби́льности** тотороҡлоҡ күрһәткесе

**СТАБИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тотороҡло, стабиль; **стаби́льные це́ны** тотороҡло хаҡтар

**СТА́ВЕНЬ** *м* и **СТА́ВНЯ** *ж* тәҙрә ҡапҡасы

**СТА́ВИТЬ** *несов.* **1.** *кого* баҫтырыу, баҫтырып ҡуйыу, торғоҙоу; **ста́вить на́ ноги** аяҡҡа баҫтырыу **2.** *что* ҡуйыу, терәп (теҙеп) ҡуйыу, ултыртыу; **ста́вить столб** бағана ултыртыу; **ста́вить посу́ду в шкаф** һауыт-һабаны шкафҡа ҡуйыу **3.** *что* ҡуйыу, һалыу; **ста́вить компре́сс** боҫлама ҡуйыу; **ста́вить ба́нки** банка һалыу **4.** *кого*; *разг.* ҡуйыу, тәғәйенләү; **ста́вить на пост** посҡа ҡуйыу; **ста́вить но́вого председа́теля** яңы рәйес тәғәйенләү **5.** *что* и *без доп.* (*в азартных играх, спорах*) ҡуйыу; **ста́вить де́ньги** аҡса ҡуйыу; **6.** *что* ҡуйыу, ҡороу, һалыу, күтәреү; **ста́вить телефо́н** телефон ҡуйыу; **ста́вить силки́** тоҙаҡ ҡороу **7.** *что* ҡуйыу, баҫыу, һалыу; **ста́вить печа́ть** мисәт баҫыу; **ста́вить по́дпись** ҡул ҡуйыу; **ста́вить зна́ки препина́ния** тыныш билдәләрен ҡуйыу **8.** *что*; *разг.* (*строить*) ҡуйыу, һалыу, күтәреү, төҙөү; **ста́вить дом** өй һалыу **9.** *что* (*организовывать*) ойоштороу, яйлау, яйға һалыу; **ста́вить добы́чу зо́лота** алтын табыуҙы ойоштороу **10.** *что* сәхнәгә ҡуйыу; **ста́вить о́перу** операны сәхнәгә ҡуйыу **11.** *что* (*выдвигать*) ҡуйыу, күтәреп сығыу, тәҡдим итеү; **ста́вить вопро́с на обсужде́ние** мәсьәләне тикшереүгә ҡуйыу **12.** *кого-что* хәлгә ҡуйыу; **ста́вить в тру́дное положе́ние** ауыр хәлгә ҡуйыу **13.** (*рассматривать как что-л.*) иҫәпләү, итеп ҡуйыу; **ста́вить в вину́** ғәйеп итеп ҡуйыу; **ста́вить в приме́р** үрнәк итеп ҡуйыу ♦ **ста́вить в тупи́к** аптырашта ҡалдырыу; **ста́вить на одну́ до́ску** *см.* **оди́н**; **ста́вить па́лки в колёса** *см.* **па́лка**; **ста́вить под вопро́с** *см.* **вопро́с**; **ста́вить знак ра́венства** тиң итеп ҡарау; **ста́вить то́чки над "и"** эште аҙағына еткереү, ослап ҡуйыу; **ста́вить во главу́ угла́** *см.* **глава́**; **ста́вить на вид** *см.* **вид**; **ни в грош не ста́вить** *см.* **грош**; **ста́вить на ка́рту** *см.* **ка́рта**

**СТА́ВКА** *ж* **1.** *воен.* ставка; **ста́вка кома́ндования** командованиеның ставкаһы **2.** *на кого-что*; *перен.* (*расчёт*) иҫәп, таяныс; **ста́вка на механиза́цию** механизацияға тотолған иҫәп **3.** (*оклад*) эш хаҡы; **повыше́ние ста́вок** эш хаҡтарын күтәреү **4.** *фин.* норма, күләм; **ста́вки нало́га** һалым нормалары **5.** (*в азартных играх*) ҡуйылған аҡса; **вы́играть ста́вку** ҡуйылған аҡсаны отоу

**СТА́ВЛЕННИК** *м* и **СТА́ВЛЕННИЦА** *ж* кемдеңдер кешеһе, ҡуйылған кеше (*вазифаға өҫтән күрһәтеп ҡуйылған кеше*)

**СТАВНИ́К** *м*; *рыб.* нәрәтә

**СТАВРИ́ДА** *ж* ставрида (*диңгеҙ балығы*)

**СТАДИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* стадиаль, стадиялы; **стадиа́льное разви́тие** стадиялы үҫеш

**СТАДИО́Н** *м* стадион; **трибу́ны стадио́на** стадион трибуналары

**СТА́ДИЯ** *ж* стадия, осор; **ста́дия разви́тия** үҫеш стадияһы

**СТА́ДНОСТЬ** *ж* өйөрлөк, көтөү булып ойошҡанлыҡ, өйөр (көтөү) булып йөрөү сифаты; **инсти́нкт ста́дности** өйөрлөк инстинкты

**СТА́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** өйөрлө (*өйөр* (*көтөү*) *булып йәшәгән*); **ста́дные живо́тные** өйөрлө мал **2.** *перен.* өйөр ...ы; **ста́дные пра́вила** өйөр ҡағиҙәләре

**СТА́ДО** *с* **1.** көтөү; **ста́до коро́в** һыйыр көтөүе **2.** (*стая*) көтөү; (*о животных и птицах*) туп, өйөр; (*о рыбах*) эркеү

**СТАЖ** *м* стаж; **трудово́й стаж** хеҙмәт стажы

**СТАЖЁР** *м* стажёр

**СТАЖИРОВА́ТЬ** и **СТАЖИ́РОВАТЬ** *несов.* стажировка үтеү; **стажирова́ть в институ́те** институтта стажировка үтеү

**СТАЖИРОВА́ТЬСЯ** и **СТАЖИ́РОВАТЬСЯ** *несов. см.* **стажи́ровать**

**СТАЖИРО́ВКА** *ж* стажировка; **проходи́ть стажиро́вку** стажировка үтеү

**СТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **ста́ять**

**СТА́ЙЕР** *м* стайер (*алыҫ араға йүгереүсе, йөҙөүсе спортсы*)

**СТА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое өйөр (туп) булып йәшәүсе; **ста́йные пти́цы** туп булып йәшәүсе ҡоштар

**СТАКА́Н** *м* стакан; **гранёный стака́н** ҡырлы стакан

**СТАЛАГМИ́Т** *м* сталагмит (*мәмерйә иҙәненә тушәмдән тамып үҫкән әзбиз ташбармаҡ*)

**СТАЛАГМИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** сталагмит(тар) ...ы; **сталагми́товые образова́ния** сталагмит яһалмалары **2.** сталагмитлы; **сталагми́товая пеще́ра** сталагмитлы мәмерйә

**СТАЛАКТИ́Т** *м* сталактит (*мәмерйә түшәмендә ҡатып аҫылынған әзбиз ташбармаҡ*)

**СТАЛАКТИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** сталактит(тар) ...ы; **сталакти́товые образова́ния** сталактит яһалмалары **2.** сталактитлы; **сталакти́товая пеще́ра** сталактитлы мәмерйә

**СТАЛЕБЕТО́Н** и **СТАЛЬБЕТО́Н** *м* ҡорос-бетон

**СТАЛЕВА́Р** *м* ҡоросс (*ҡорос иретеүсе*)

**СТАЛЕЛИТЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое ҡорос ҡойоу ...ы; **сталелите́йный цех** ҡорос ҡойоу цехы

**СТАЛЕЛИТЕ́ЙЩИК** *м* ҡорос ҡойоусы

**СТАЛЕПЛАВИ́ЛЬЩИК** *м* ҡорос иретеүсе

**СТАЛЕПРОКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое ҡорос прокатлау ...ы; **сталепрока́тный цех** ҡорос прокатлау цехы

**СТАЛЕПРОКА́ТЧИК** *м* ҡорос прокатлаусы

**СТА́ЛКИВАТЬ** *несов. см.* **столкну́ть**

**СТА́ЛКИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **столкну́ться** **2.** *страд. от* **ста́лкивать**

**СТАЛЬ** *ж* ҡорос; **нержаве́ющая сталь** тутыҡмай торған ҡорос; **ва́рка ста́ли** ҡорос иретеү ♦ **дама́сская сталь** *см.* **дама́сский**

**СТАЛЬНО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡорос, ҡоростан ҡойолған (яһалған); **стальна́я про́волока** ҡорос сым **2.** ҡорос ...ы, ҡорос эшләй торған; **стально́й заво́д** ҡорос заводы **3.** *перен.* ҡорос, ҡоростай, ҡорос һымаҡ (ҡаты, ныҡ); **стальна́я во́ля** ҡорос ихтыяр; **стально́й го́лос** ҡорос һымаҡ ҡаты тауыш **4.** (*о цвете*) тимер күк

**СТАМЕ́СКА** *ж* ҡасау

**СТАН I** *м* (*корпус человека*) һын, кәүҙә, буй-һын

**СТАН II** *м* **1.** *в разн. знач.* стан; **полево́й стан** ҡыр станы; **вра́жеский стан** дошман станы; **управле́ние ста́на** стан идараһы **2.** *кого-чего, какой*; *перен.* (*общественная группа*) ҡапма-ҡаршы яҡ (төркөм)

**СТАН III** *м* стан (**1.** *механизмдарҙы беркетеп тора торған нигеҙ ҡоролма* **2.** *металл эшкәртә торған преслы механизмдар системаһы*)

**СТАНДА́РТ** *м* **1.** үрнәк, стандарт; **изготовля́ть по станда́рту** үрнәк буйынса эшләү **2.** (*шаблон, трафарет*) ҡалып, стандарт; **подгоня́ть под станда́рт** ҡалыпҡа ҡыуыу

**СТАНДАРТИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** стандартлаштырыу; **стандартиза́ция дета́лей** деталдәрҙе стандартлаштырыу **2.** бер ҡалыпҡа һалыу

**СТАНДАРТИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* стандартлаштырыу, стандартҡа һалыу, стандарт итеү

**СТАНДАРТИЗИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* стандартлашыу, стандарт булыу **2.** *только несов. страд. от* **стандартизи́ровать**

**СТАНДАРТИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. см.* **стандартизи́ровать**

**СТАНДАРТИЗОВА́ТЬСЯ** **1.** *сов., несов. см.* **стандартизи́роваться** 1; **2.** *только несов. страд. от* **стандартизова́ть**

**СТАНДА́РТНОСТЬ** *ж* стандартлыҡ, стандартлы булыу; **станда́ртность изде́лий** изделиеларҙың стандартлығы

**СТАНДА́РТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** стандартлы, стандарт буйынса эшләнгән; **станда́ртная ме́бель** стандарт буйынса эшләнгән йорт йыһазы **2.** бер ҡалыпҡа һалынған, бер үк төрлө, стандарт; **станда́ртные те́мы** бер үк төрлө темалар

**СТАНИ́НА** *ж* станина (**1.** *машинаның, станоктың һ.б. нигеҙе* **2.** *хәрб. туптың лафеты*)

**СТАНИ́ЦА** *ж* станица (*казактарҙың ҙур ауылы*)

**СТАНИ́ЧНИК** *м* станицала йәшәүсе

**СТАНКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** станок ...ы; **станко́вое обору́дование** станок ҡоролмалары **2.** *воен.* станоклы; **станко́вый пулемёт** станоклы пулемёт **3.** *иск.* станокта башҡарлыған (эшләнгән); **станко́вая жи́вопись** станокта башҡарылған һынлы сәнғәт

**СТАНКОСТРОЕ́НИЕ** *с* станоктар төҙөү (етештереү, эшләү)

**СТАНКОСТРОИ́ТЕЛЬ** *м* станоктар төҙөүсе

**СТАНКОСТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое станоктар төҙөү (эшләү) ...ы; **станкострои́тельный заво́д** станоктар эшләү заводы

**СТАНОВИ́ТЬСЯ I** *несов. см.* **стать** I 1—4, 6

**СТАНОВИ́ТЬСЯ II** *несов. см.* **стать** II 3

**СТАНОВИ́ЩЕ** *с* **1.** туҡталыу урыны, туҡталыш **2.** ауыл (*гәҙәттә йылға буйындағы*)

**СТАНОВЛЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* үçеш, нығыныу, формалашыу; **становле́ние но́вых форм хозя́йствования** хужалыҡ итеүҙәге яңы формалар үçеше; **становле́ние хара́ктера** характер формалашыу

**СТАНОВО́Й,** -ая, -ое *ист.* **1.** стан …ы; **станово́е управле́ние** стан идараһы **2.** *в знач. сущ.* **станово́й** *м* (*становой пристав*) становой ♦ **станово́й хребе́т** *чего* арҡа һөйәге (*мөһим нәмә*)

**СТАНО́К** *м* **1.** *в разн. знач.* станок; **тка́цкий стано́к** туҡыу станогы; **типогра́фский стано́к** типография станогы; **тока́рный стано́к** ҡырыу станогы; **ста́вить карти́ну на стано́к** картинаны станокка ҡуйыу; **стано́к для ко́вки лошаде́й** ат дағалау станогы **2.** (*стойло*) кәртә, аран; **стано́к для теля́т** быҙау кәртәһе

**СТАНО́ЧНИК** *м* и **СТАНО́ЧНИЦА** *ж* станоксы (*станокта эшләүсе*)

**СТАНО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое станок(тар) …ы; **стано́чное обору́дование** станоктар ҡорамалы

**СТАНЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое станция …ы; **станцио́нный зал** станция залы

**СТА́НЦИЯ** *ж*; *в разн. знач.* станция; **железнодоро́жная ста́нция** тимер юл станцияһы; **селекцио́нная ста́нция** селекция станцияһы; **телефо́нная ста́нция** телефон станцияһы ♦ **орбита́льная ста́нция** орбиталь станция (*йыһан аппараты*)

**СТА́ПЕЛЬ** *м* стапель (*судноны төҙөү, ремонтлау һәм һыуға төшөрөү өсөн ауыш баçма кеүек бетонланған ҡоролма*)

**СТА́ПТЫВАТЬ** *несов. см.* **стопта́ть**

**СТАРА́НИЕ** *с* тырышлыҡ; **приложи́ть стара́ние** тырышлыҡ һалыу

**СТАРА́ТЕЛЬ** *м* **1.** *уст.*, *прост.* бағыусы, хәстәрләүсе **2.** (*золотоискатель*) алтын йыуыусы (эҙләүсе), старатель

**СТАРА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тырыш; **стара́тельный учени́к** тырыш уҡыусы

**СТАРА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое алтын йыуыусы(лар) …ы, старателдәр …ы; **стара́тельская арте́ль** старателдәр артеле

**СТАРА́ТЕЛЬСТВО** *с* алтын йыуыу эше, старателлек; **занима́ться стара́тельством** старателлек менән шөғөлләнеү

**СТАРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** тырышыу; **стара́ться изо всех сил** бар көскә тырышыу **2.** *с неопр.* башҡарырға (үтәргә) ынтылыу, тырышыу; **стара́ться быть поле́зным** файҙалы булырға тырышыу

**СТАРЕ́ЙШИНА** *м*; *ист.* ырыу башлығы, аҡһаҡал ♦ **сове́т старе́йшин** аҡһаҡалдар ҡоро

**СТАРЕ́ТЬ** *несов.* **1.** ҡартайыу, олоғайыу; **все старе́ют** бөтәһе лә ҡартая **2.** иçкереү; **те́ма устаре́ла** тема иçкерҙе **3.** *спец.* эшлектән сығыу; **мета́лл старе́ет** металл эшлектән сыға

**СТА́РЕЦ** *м* **1.** (*старик*) ҡарт (оло) кеше **2.** (*отшельник*) ҡарт монах, монахтар остазы

**СТАРИ́К** *м* **1.** бабай, ҡарт, ҡарт (оло) кеше **2.** *мн.* **старики́** оло кешеләр, ҡарттар, ололар

**СТАРИКО́ВСКИЙ,** -ая, -ое ҡарт(тар) …ы, ҡарттарға хас; **старико́вские привы́чки** ҡарттар ғәҙәте

**СТАРИНА́ 1.** *ж* боронғо (элекке) заман, күптәнге заман; **в старину́** борон заманда **2.** *ж* боронғо (иçке) ғөрөф-ғәҙәттәр, боронғо (иçке) нәмәләр, иçкелек; **собира́ть предме́ты старины́** боронғо нәмәләр йыйыу **3.** *м*; *разг.* (*в обращении*) ҡарт, ҡартлас ♦ **тряхну́ть старино́й** йәштәрсә ҡыланып алыу; бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта

**СТАРИ́НКА** *ж*; *разг.*, *ласк. от* **старина́** 1, 2 ♦ **по стари́нке**: 1) иçке ғәҙәт буйынса 2) иçкесә

**СТАРИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** боронғо, элекке, бик күптәнге; **стари́нные моне́ты** боронғо аҡсалар; **стари́нное зда́ние** бик күптәнге бина **2.** иçке, күптәнге; **стари́нный друг** иçке дуç

**СТА́РИТЬ** *несов. кого* ҡартайтыу, ҡарт күрһәтеү; **морщи́ны вас ста́рят** һырҙар һеҙҙе ҡарт күрһәтә

**СТА́РИТЬСЯ** *несов.* ҡартайыу

**СТА́РИЦА I** *ж см.* **ста́рец** 2

**СТА́РИЦА II** *ж* иçке үҙән, үле йылға

**СТАРИЧО́К** *м* ҡартыҡай, бабаҡай

**СТА́РКА** *ж* старка (*араҡы төрө*)

**СТАРО…** *урыç телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "иçке", "боронғо" мәғәнәһен белдергән беренсе өлөшө, мәç.*, **старославя́нский** иçке славян …ы; **старокупе́ческий** боронғо сауҙагәрҙәр …ы

**СТАРОВЕ́Р** *м* **1.** старовер (*христиандарҙа иçке дин кешеһе*) **2.** *перен.* иçке ҡарашлы кеше, иçкегә йәбешеп ятыусы

**СТАРОДА́ВНИЙ,** -яя, -ее **1.** боронғо, элекке, бик күптәнге; **стари́нные времена́** бик боронғо замандар **2.** борондан килгән, боронғо, иçке; **стародáвние преда́ния** боронғо риүәйәттәр

**СТАРОЖИ́Л** *м* **1.** электән (бик күптән) йәшәүсе **2.** *обычно мн.* **старожи́лы** (*коренные жители*) төп (ерле) халыҡ, борондан йәшәгән кешеләр

**СТАРОЗАВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иçке ҡарашлы, иçкесә йәшәүсе, иçке заман …ы; **старозаве́тный челове́к** иçке ҡарашлы кеше **2.** иçке, борондан килгән; **старозаве́тные взгля́ды** иçке ҡараштар

**СТАРОМО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иçке модалы (фасонлы); **старомо́дная оде́жда** иçке модалы кейем **2.** иçке ҡарашлы, иçкелеккә йәбешеп ятҡан; **старомо́дный челове́к** иçке ҡарашлы кеше

**СТАРООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое ҡарт күренгән, оло сырайлы

**СТАРООБРЯ́ДЕЦ** *м* и **СТАРООБРЯ́ДКА** *ж* старообрядсы

**СТАРООБРЯ́ДЧЕСТВО** *с* старообрядсылыҡ

**СТА́РОСТА** *м* староста; **се́льский ста́роста** ауыл старостаһы; **ста́роста кла́сса** синыф старостаһы

**СТА́РОСТЬ** *ж* **1.** ҡартлыҡ; **ста́рость не ра́дость** ҡартлыҡ — шатлыҡ түгел **2.** (*ветхость, изношенность*) иçкергәнлек, туҙғанлыҡ; **жёлтое**

**от ста́рости бельё** иҫкереп һарғайған эске кейем ♦ **на ста́рости лет** *см.* **лета́**

**СТАРТ** *м* старт; **дать старт** старт биреү; **выходи́ть на старт** стартҡа сығыу ♦ **на старт!** стартҡа! (*теҙелергә*)

**СТА́РТЕР** и **СТАРТЁР** *м* стартер (**1.** *старт сигналын биреүсе* **2.** *эске яныулы двигателдәрҙе эшләтеп ебәрә торған ҡулайлама*); **нажа́ть на ста́ртер** стартерға баҫыу

**СТАРТОВА́ТЬ** *сов., несов.* старт алыу, ярыш башлау; **мотого́нщики старту́ют** мотоуҙышсылар старт ала

**СТА́РТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** старт ...ы; **ста́ртовый пистоле́т** старт пистолеты **2.** стартты билдәләгән, старт ...ы; **ста́ртовая ли́ния** старт һыҙығы

**СТАРУ́ХА** *ж* әбей, ҡарсыҡ

**СТАРУ́ШКА** *ж* әбекәй

**СТА́РЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ҡарттарға хас булған, ҡарттарса, ҡартлыҡ ...ы; **ста́рческие боле́зни** ҡартлыҡ ауырыуҙары

**СТАРШЕКЛА́ССНИК** *м* и **СТАРШЕКЛА́ССНИЦА** *ж* юғары синыф уҡыусыһы

**СТАРШЕКУ́РСНИК** *м* и **СТАРШЕКУ́РСНИЦА** *ж* юғары курс студенты, юғары курста уҡыусы студент

**СТА́РШИЙ,** -ая, -ее **1.** оло, өлкән; **ста́рший сын** оло ул **2.** *в знач. сущ.* **ста́ршие** *мн.* (*взрослые*) ололар, өлкәндәр **3.** (*стоящий выше по званию, чину, должности и т.п.*) өлкән; **ста́рший ма́стер** өлкән мастер; **ста́рший нау́чный сотру́дник** өлкән ғилми хеҙмәткәр **4.** *в знач. сущ.* **ста́рший** *м* и **ста́ршая** *ж* етәксе, башлыҡ; **ста́рший отделе́ния** бүлек башлығы **5.** юғары; **ста́рший класс** юғары синыф

**СТАРШИНА́** *м*; *в разн. знач.* старшина; **старшина́ ро́ты** рота старшинаһы; **волостно́й старшина́** волость (улус) старшинаһы

**СТАРШИНСТВО́** *с* ололоҡ (*йәш, дәрәжә һ.б. буйынса*); **занима́ть места́ по старши́нству** ололоҡ буйынса урындар алыу

**СТА́РЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡарт, оло, ҡары; **ста́рый челове́к** ҡары кеше; **ста́рое де́рево** ҡарт ағас; **я уже́ стар** оломон инде **2.** иҫке, элекке, әүәлге, күптәнге; **ста́рый друг** күптәнге дуҫ; **ста́рая ра́на** элекке яра; **ста́рый сад** иҫке баҡса; **ста́рый анекдо́т** иҫке мәҙәк **3.** иҫке, иҫкергән; **ста́рый уче́бник** иҫке дәреслек; **ста́рое пла́тье** иҫке күлдәк; **ста́рый биле́т** иҫке билет **4.** иҫке, элекке; **ста́рая кварти́ра** элекке фатир; **ста́рые газе́ты** иҫке гәзиттәр **5.** (*старинный*) боронғо, элекке; **ста́рая посу́да** боронғо һауыт-һаба; **ста́рая моне́та** боронғо аҡса **6.** (*опытный*) тәжрибәле, ҡарт; **ста́рый во́ин** ҡарт яугир; **ста́рый лесору́б** тәжрибәле урман ҡырҡыусы **7.** (*относящийся к урожаю или запасам предшествующего года*) иҫке, үткән йылғы, былтырғы; **ста́рый хлеб** иҫке иген **8.** *в знач. сущ.* **ста́рое** *с* иҫке(ләр), элекке(ләр), иҫкелек; **по́мнить ста́рое** элеккеләрҙе иҫләү ♦ **ста́рая де́ва** ҡарт (ултырған) ҡыҙ; **ста́рая пе́сня** иҫке йыр (*күп ҡабатланған, тапалған һүҙ, фекер, тәҡдим һ.б.*); **ста́рый стиль** иҫке стиль, элекке иҫәп (*боронғо йыл иҫәбе*); **и ста́рый и ма́лый**; **и стар и мал**; **и стар и млад** йәше-ҡарты, бөтә булғаны, барыһы ла, олоһо-кесеһе; **по ста́рой па́мяти** элекке танышлыҡ (дуҫлыҡ) буйынса

**СТАРЬЁ** *с собир.*; *разг.* иҫке-моҫҡо (нәмәләр), иҫкергән (күренеш); **торгова́ть старьём** иҫке-моҫҡо менән һатыу итеү

**СТАРЬЁВЩИК** *м* и **СТАРЬЁВЩИЦА** *ж* иҫке-моҫҡосо, иҫке-моҫҡо менән һатыу итеүсе

**СТАСКА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ташыу, ташып ҡуйыу (бөтөрөү, алыу); **стаска́ть се́но** бесәнде ташып бөтөрөү

**СТА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **стащи́ть** 1—3, **стаска́ть**

**СТА́СКИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* (*сниматься — об одежде, обуви*) сиселеү **2.** *страд. от* **ста́скивать**

**СТАСОВА́ТЬ** *сов. что* бутау, аралаштырыу (*кәрт тураһында*)

**СТАСОВА́ТЬСЯ** *сов.* буталыу, аралашыу (*кәрт тураһында*)

**СТА́ТИКА** *ж* статика (**1.** *механиканың бер бүлеге* **2.** *тынлыҡ хәле, тик тороу*)

**СТАТИ́СТ** *м* и **СТАТИ́СТКА** *ж* статист (*театрҙа һүҙһеҙ ролдәрҙе йәки ярҙамсы ролдәр башҡарыусы актёр*)

**СТАТИ́СТИК** *м* статистик (*статистика белгесе*)

**СТАТИ́СТИКА** *ж*; статистика (**1.** *ижтимағи тормоштоң, йәмғиәттең төрлө күренештәренең иҫәбен алып, һан күрһәткестәрен сағыштырып өйрәнгән фән* **2.** *халыҡ хужалығы тармаҡтары үҫешен иҫәпкә алыу* **3.** *төрлө фәндә һан күрһәткесе менән эш итеү, өйрәнеү, тикшереү ысулы*); **занима́ться стати́стикой** статистика менән шөғөлләнеү; **стати́стика рожда́емости** тыуыу статистикаһы

**СТАТИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** статистик; **статисти́ческие све́дения** статистик мәғлүмәттәр **2.** статистика ...ы; **статисти́ческий отде́л** статистика бүлеге

**СТАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** статик; **стати́ческая тео́рия** статик теория **2.** *см.* **стати́чный**

**СТАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое статик, хәрәкәтһеҙ; **стати́чное состоя́ние** статик хәл

**СТА́ТНЫЙ,** -ая, -ое зифа, зифа буйлы, һомғол, матур һынлы; **ста́тная де́вушка** зифа буйлы ҡыҙ; **быть ста́тным** һомғол булыу

**СТА́ТОР** *м* статор (*электр машиналарының, турбиналарҙың әйләнмәй торған өлөшө*)

**СТА́ТУС** *м* (*правовое положение*) статус; **ста́тус языка́** телдең статусы

**СТА́ТУС-КВО́** *м нескл.*; *юр.* (*сложившееся положение*) статус-кво, хәл

**СТАТУ́Т** *м* статут; **стату́т о́рдена Сла́вы** Дан ордены статуты; **стату́т ООН** БМО-ның статуты

**СТАТУЭ́ТКА** *ж* статуэтка, һын; **статуэ́тка из бро́нзы** бронзанан яһалған һын

**СТА́ТУЯ** *ж* статуя, һын

**СТАТЬ I** *сов.* **1.** баҫыу, тороу; **ни стать, ни сесть** баҫып та, ултырып та булмай; **стать на цы́почки** аяҡ осона баҫыу; **стать у стены́** стена эргәһенә баҫыу; **стать в о́чередь** сиратҡа тороу; **стать на ва́хту** вахтаға тороу; **стать на заме́ну** алмашҡа баҫыу **2.** туҡтау, туҡтап тороу (ҡалыу), туҡталыу; **ло́шадь ста́ла** ат туҡтаны; **часы́ ста́ли** сәғәт туҡтаған **3.** (*расположиться, поместиться*) урынлашыу, туҡтау, туҡталыу; **отря́д стал в шко́ле** отряд мәктәптә урынлашты; **стать на ночёвку** ҡунырға туҡталыу **4.** (*подняться для борьбы*) күтәрелеү; **стать на защи́ту и́стины** хаҡлыҡты яҡлар өсөн күтәрелеү **5.** *кому-чему, во что*; *разг.* төшөү, тороу; **стать в копе́ечку** бик арзанға төшөү **6.** *перен.*, *разг.* килеп сығыу, ҡалҡыу; **стал вопро́с** мәсьәлә килеп сыҡты ♦ **во что бы то ни ста́ло** ни генә булмаһын, нисек кенә булмаһын; **стать в тупи́к** ауыр хәлдә ҡалыу; **стать гру́дью** *см.* **грудь**; **стать горо́й** *см.* **гора́**; **стать на одну́ до́ску** *см.* **доска́**; **стать поперёк доро́ги** *см.* **доро́га**; **стать ме́жду** *кем кемдеңдер* араларына инеү, араларын боҙоу; **стать на коле́ни** теҙ сүгеү, буйһоноу; **река́ ста́ла** йылға туңды; **стать на́ ноги**: 1) һауығыу, аяҡҡа баҫыу; 2) үҙаллылыҡ алыу, аяҡҡа баҫыу; **стать поперёк го́рла** *см.* **го́рло**; **стать у вла́сти** хакимлыҡты алыу

**СТАТЬ II** *сов.* **1.** *с неопр.* (*входит в состав сложного сказуемого в значении "начать"*) башлау; **он стал учи́ться** ул уҡый башланы; **ста́ло света́ть** яҡтыра башланы **2.** *с неопр.* (*употребляется для образования будущего времени глаголов несовершенного вида*) -асаҡ/-ясаҡ; **не ста́ну спать** йоҡламаясаҡмын; **он э́того не ста́нет де́лать** ул быны эшләмәйәсәк **3.** (*употребляется в значении связки*) булыу, китеү, төшөү, булып китеү; **стать взро́слым** өлкән кеше булыу; **стать агроно́мом** агроном булып китеү; **стать поста́рше** олоғая төшөү; **ста́ло светло́** яҡтырып китте; **мне ста́ло не по себе́** *безл.* уңайһыҙланып киттем **4.** *с кем-чем* и *без доп.* (*произойти, случиться*) булыу; **у меня́ что́-то ста́ло с се́рдцем** йөрәгемә әллә ни булды **5.** *безл.* (*с отрицанием — перестать быть в наличии*) бөтөү, юҡ булыу, юҡҡа сығыу; **не ста́ло сил** көс бөттө **6.** (*умереть*) үлеү, вафат булыу; **его́ не ста́ло** ул үлде ♦ **ста́ло быть** *вводн. сл.* тимәк, шулай булғас; **ста́нет** *с кого* -нан/-нән булыр (көт тә тор)

**СТАТЬ III** *ж* **1.** (*осанка*) һын, буй-һын, кәүҙә; **краси́вая стать** матур һын **2.** *обычно мн.* **ста́ти** (*у животных, преимущественно у лошадей*) һын, тороҡ, кәүҙә **3.** *перен.*, *уст.* (*характер*) холоҡ ♦ **под стать**: 1) *чему* (*подобен*) оҡшаш булыу, һымаҡ (кеүек) булыу; 2) *кому-чему* (*в соответствии с кем-чем*) -ға/-гә тура килеү (килеп тороу); **с како́й ста́ти?** ни өсөн әле?, нишләп әле?, нилектән әле?

**СТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* булыу; **что с ним ста́нется** ни булыр тиһең уға ♦ **мо́жет ста́ться** *вводн. сл.* шулай ҙа булыуы мөмкин

**СТАТЬЯ́** *ж* **1.** мәҡәлә; **газе́тная статья́** гәзит мәҡәләһе; **передова́я статья́** баш мәҡәлә **2.** (*самостоятельный раздел в юридических и финансовых документах, словарях*) статья; **статья́ уголо́вного ко́декса** енәйәт кодексы статьяһы; **статья́ дохо́да** керем статьяһы; **слова́рная статья́** һүҙлек статьяһы **3.** (*разряд*) статьялы; **старшина́ пе́рвой статьи́** беренсе статьялы старшина

**СТАФИЛОКО́КК** *м*; *мед.* (*бактерия*) стафилококк

**СТАФИЛОКО́ККОВЫЙ,** -ая, -ое *мед.* стафилококк ...ы; **стафилоко́кковая анги́на** стафилококк ангинаһы

**СТАЦИОНА́Р** *м* стационар (*һәр ваҡыт бер урында булған учреждение*)

**СТАЦИОНА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*не передвижной*) стационар; **стациона́рная библиоте́ка** стационар китапхана; **стациона́рная больни́ца** стационар больница (хәстәхана) **2.** (*не амбулаторный*) хәстәханала (больницала) ятып дауаланыусы; **стациона́рный больно́й** хәстәханала ятып дауаланыусы ауырыу

**СТАЧА́ТЬ** *сов. что* (ҡуша) тегеп сығыу (тегеү); **стача́ть голени́ще сапога́** итеккә ҡуныс тегеү

**СТА́ЧЕЧНИК** *м* стачкасы (*стачкала ҡатнашыусы*)

**СТА́ЧЕЧНЫЙ,** -ая, -ое стачка ...ы; **ста́чечный комите́т** стачка комитеты; **ста́чечная борьба́** стачка көрәше

**СТА́ЧИВАТЬ I** *несов. см.* **стача́ть**

**СТА́ЧИВАТЬ II** *несов. см.* **сточи́ть**

**СТА́ЧИВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **ста́чивать** I

**СТА́ЧИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **сточи́ться** **2.** *страд. от* **ста́чивать** II

**СТА́ЧКА** *ж* стачка, эш ташлау; **ста́чка рабо́чих** эшселәр стачкаһы

**СТАЩИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һөйрәп (тартып) төшөрөү, тартып сығарыу; **стащи́ть мешо́к с теле́ги** тоҡто арбанан һөйрәп төшөрөү; **стащи́ть ска́терть со стола́** ашъяулыҡты өҫтәлдән тартып төшөрөү; **стащи́ть ло́дку в во́ду** кәмәне һыуға һөйрәп төшөрөү **2.** *что*; *разг.* (*снять одежду, обувь с кого-л.*) һалдырыу, һалдырып алыу, сисендереү, сисендереп алыу; (*с себя*) һалып ташлау; **стащи́ть сапоги́** итек һалдырыу **3.** *кого-что* (*тащa, собрать в одно место*) (һөйрәп) ташып алыу (ҡуйыу); **стащи́ть мешки́ в амба́р** тоҡтарҙы келәткә ташып алыу **4.** *кого-что*; *разг.* (*украсть*) сәлдереү, урлау

**СТА́Я** *ж* **1.** көтөү; (*животных, птиц*) өйөр, туп; (*рыб*) эркеү; **ста́я волко́в** бүреләр өйөрө; **журавли́ная ста́я** торналар тубы **2.** *перен.* төркөм, өйөр; **ста́я ребяти́шек** балалар төркөмө

**СТА́ЯТЬ** *сов.* ireү, ireп бөтөү (*кар, боҙ һ.б. тураһында*)

**СТВОЛ** *м* **1.** (*дерева, кустарника*) олон; **ствол де́рева** ағас олоно **2.** көбәк; **ствол ружья́** мылтыҡ көбәге; **ствол ору́дия** туп көбәге **3.** *горн.* шахта үҙәге (*шахтаның тәрәнлеген күрһәткән вертикаль юл*) **4.** *анат.* көпшә; **не́рвный ствол** нервы көпшәһе; **ко́рень и ствол во́лоса** сәстең тамыры һәм көпшәһе

**СТВОЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (күп) олонло; **стволи́стое де́рево** олонло ағас **2.** көпшәле; **стволи́стая свёкла** көпшәле сөгөлдөр

**СТВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое олонло, көбәк ...ы, көбәкле; **ство́льная коро́бка ружья́** мылтыҡтың көбәк тартмаһы

**СТВОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **створо́жить**

**СТВОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **створо́житься** **2.** *страд. от* **створа́живать**

**СТВО́РКА** *ж* ҡапҡас (*тәҙрәнең, ишектең һ.б.*); **ство́рки ста́вней** тәҙрә ҡапҡастары

**СТВОРО́ЖИТЬ** *сов. что* **1.** (*превратить в творог*) эремсек яһау, эретеү **2.** (*заставить свернуться*) эретеү; **створо́жить молоко́** һөт эретеү

**СТВОРО́ЖИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*превратиться в творог*) эремсеккә әйләнеү, эремсек булыу **2.** (*свернуться*) эреү

**СТВО́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое ике яҡҡа асылмалы (*тәҙрә, шкаф һ.б.*)

**СТЕАРИ́Н** *м* стеарин (*шәм, һабын һ.б. яһауға китә торған май*)

**СТЕАРИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** стеарин, стеариндан яһалған; **стеари́новые све́чи** стеарин шәмдәр **2.** стеарин ...ы; **стеари́новый заво́д** стеарин заводы

**СТЕ́БЕЛЬ** *м* **1.** һабаҡ; **сте́бель расте́ния** үҫемлек һабағы; **вы́пустить сте́бель** һабаҡ ебәреү **2.** *спец.* (*часть предмета, устройства, имеющая вид трубки, стержня*) һап; **сте́бель пера́** перо һабы

**СТЕБЕЛЬКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *бот.* һабаҡлы; **стебелько́вое расте́ние** һабаҡлы үҫемлек

**СТЕ́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *бот. см.* **стебелько́вый**

**СТЕБЕ́ЛЬЧАТЫЙ,** -ая, -ое (*имеющий вид стебля*) һабаҡ кеүек (һымаҡ) ♦ **стебе́льчатый шов** сүпләп сигеү

**СТЕБЛЕВА́НИЕ** *с*; *бот.* һабаҡҡа ултырыу, һабаҡ сығарыу, көпшәләнеү

**СТЕБЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое күп һабаҡлы (тармаҡлы)

**СТЁГАНКА** *ж*; *разг.* һырма (*йылы өҫ кейеме*)

**СТЁГАНЫЙ,** -ая, -ое һырыған, һырылған; **стёганое одея́ло** һырыған юрған

**СТЕГА́ТЬ I** *несов. что* һырыу; **стега́ть одея́ло** юрған һырыу

**СТЕГА́ТЬ II** *несов. кого-что прям., перен.* (*хлестать*) сыбыҡлау, сыбыртҡылау, ҡамсылау, һыҙырыу, һыҙырып (әләктереп) һуғып ебәреү, өтөү, яндырыу; **ре́зкий ве́тер стега́л лицо́** әсе ел битте өтә ине

**СТЕГНУ́ТЬ** *сов. см.* **стега́ть** II; **стегну́ть коня́** атты ҡамсылап алыу

**СТЁЖКА I** *ж* **1.** *см.* **стега́ть** I; **2.** йөй, сәнсем; **кру́пная стёжка** эре сәнсемле йөй; **ме́лкая стёжка** ваҡ сәнсем

**СТЁЖКА II** *ж*; *трад.-поэт.* һуҡмаҡ, берләм юл

**СТЕЖО́К** *м* сәнсем (*тегеү эшендә*); **шить ме́лкими стежка́ми** ваҡ сәнсем менән тегеү

**СТЕЗЯ́** *ж* **1.** *уст.* юл, оло юл **2.** *перен., высок.* эшмәкәрлек, тормош юлы

**СТЕК** *м* ат сыбығы (*осонда ҡайыш тоҡанлы ат ҡыуа торған шыйыҡ сыбыҡ*)

**СТЕКА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **стечь** **2.** ағып төшөү

**СТЕКА́ТЬСЯ** *несов. см.* **сте́чься**

**СТЕКЛЕНЕ́ТЬ** *несов.* быяла кеүек булыу; **глаза́ ста́ли стеклене́ть** күҙҙәре быяла кеүек була башланы

**СТЕКЛИ́ЛЬЩИК** *м*; *спец.* күн шымартыусы

**СТЕКЛИ́ТЬ** *несов. что* **1.** быяла ҡуйыу **2.** *спец.* (*шлифовать кожу*) күн шымартыу

**СТЕКЛО́** *с в разн. знач.* быяла; **зерка́льное стекло́** көҙгө быялаһы; **ла́мповое стекло́** лампа (шәм) быялаһы; **увеличи́тельное стекло́** ҙурайтҡыс быяла

**СТЕКЛО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "быяла" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **стеклоupваре́ние** быяла ҡайнатыу

**СТЕКЛОВА́Р** *м* быяла ҡайнатыусы (*эшсе*)

**СТЕКЛОВАРЕ́НИЕ** *с* быяла ҡайнатыу

**СТЕКЛОВА́РНЫЙ** и **СТЕКЛОВА́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое быяла ҡайнатыу ...ы; **стеклова́рная печь** быяла ҡайнатыу мейесе

**СТЕКЛОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое быялаға оҡшаш, быяла һымаҡ (кеүек)

**СТЕКЛОВОЛОКНО́** *с* быяла сүс

**СТЕКЛО́ГРАФ** *м* стеклограф (*быяла менән китап баҫыу приборы*)

**СТЕКЛОГРАФИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* стеклографиялау

**СТЕКЛОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое стеклография ...ы, стеклографик

**СТЕКЛОГРА́ФИЯ** *ж* стеклография, быяла баҫма

**СТЕКЛОДУ́В** *м* быяла өрөүсе (*быяланан төрлө әйберҙәр яһаусы*)

**СТЕКЛОДУ́ВНЫЙ,** -ая, -ое быяланан (өрөп) эшләү ...ы

**СТЕКЛОЗАВО́Д** *м* быяла заводы

**СТЕКЛОНИ́ТЬ** *ж* быяла еп (*быяла сүсенән*)

**СТЕКЛООЧИСТИ́ТЕЛЬ** *м* быяла таҙартҡыс (*автомобилдә һ.б.*)

**СТЕКЛОРЕ́З** *м* **1.** (*рабочий*) быяла ҡырҡыусы **2.** (*инструмент*) быяла ҡырҡҡыс

**СТЁКЛЫШКО** *с* **1.** *уменьш. от* **стекло́** **2.** (*осколок*) быяла ярсығы ♦ **как стёклышко**: 1) (*со-*

*вершенно чистый*) тап-таҙа; 2) (*совершенно трезвый*) ап-айныҡ; 3) (*безупречный в моральном отношении*) күңеле саф, рухы таҙа

**СТЕКЛЯ́ННИЦА** *ж* (*бабочка*) быяла күбәләге

**СТЕКЛЯ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** быяла; **стекля́нная посу́да** быяла һауыт-һаба **2.** (*застеклённый*) быялалы, быяла ҡуйылған; **стекля́нная дверь** быялалы ишек **3.** быяла кеүек; **стекля́нный блеск** быяла кеүек ялтыр **4.** *перен.* (*безжизненный, неподвижный*) туң, мәғәнәһеҙ, быяла кеүек; **стекля́нные глаза́** быяла кеүек күҙҙәр ♦ **держа́ть под стекля́нным колпако́м; под стекля́нным колпако́м (жить, находи́ться)** *см.* **колпа́к**

**СТЕКЛЯ́РУС** *м* быяла мунсаҡ (*оҙонса*)

**СТЕКЛЯ́ШКА** *ж*; *разг.* быяла киҫәге, быяланан биҙәү әйберҙәре

**СТЕКО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое быяла ...ы; **стеко́льный заво́д** быяла заводы; **стеко́льная промы́шленность** быяла сәнәғәте

**СТЕКО́ЛЬЩИК** *м* быяласы (*быяла ҡуйыусы*)

**СТЕ́ЛА** *ж* стела (*һәйкәл итеп ҡуйылған яҙыулы йәки һүрәтле таҡташ*)

**СТЕЛИ́ТЬ** *несов.*; *разг. см.* **стлать**

**СТЕЛИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **стла́ться**

**СТЕЛЛА́Ж** *м* стеллаж, кәштә

**СТЕ́ЛЬКА** *ж* олтораҡ

**СТЕ́ЛЬНАЯ** быуаҙ (*һыйыр малына, филгә һ.б. ҡарата*)

**СТЕМНЕ́ТЬ** *сов.*, *безл.* ҡараңғы төшөү, ҡараңғыланыу

**СТЕНА́** *ж* **1.** стена, диуар; **бреве́нчатая стена́** бүрәнә стена; **крепостна́я стена́** ҡалғә стенаһы **2.** *перен.* кәртә, ҡаршылыҡ; **ме́жду ни́ми вы́росла стена́** улар араһында ҡаршылыҡ тыуҙы **3.** *перен.* (*тесный ряд, сплошная масса*) стеналай (стена кеүек) тороу (килеү, барыу); **наро́д стоя́л стено́й** халыҡ стена кеүек торҙо ♦ **стена́ в сте́ну**; **стена́ об сте́ну**: 1) яҡында, эргәлә; 2) күршелә, күрше бүлмәлә (квартирала); **встать стено́й** берҙәм (бер төптән) тороу; **прижа́ть к стене́**; **припере́ть к стене́** ҡыҫымға алыу; **лезть на сте́ну** *см.* **лезть**; **в четырёх стена́х сиде́ть (жить)** өйҙән сыҡмай ултырыу, гел өйҙә булыу; **как об сте́ну горо́х** *см.* **горо́х**; **как за ка́менной стено́й (быть, находи́ться)** бик тыныс ҡына (йәшәү, булыу), ышаныслы (арҡалана алырлыҡ) хәлдә (булыу); **хоть голово́й об сте́ну бе́йся** башыңды ташҡа бәрһәң дә (*үтәй алмаҫлыҡ эш, ауыр хәл тураһында*)

**СТЕНА́ТЬ** *несов.* иңрәү, һыҡрау

**СТЕНГАЗЕ́ТА** *ж* (*стенная газета*) стена гәзите

**СТЕНД** *м* стенд (**1.** *күргәҙмәлә экспонаттар ҡуйыла торған ҡоролма* **2.** *тех. заводта машиналарҙы йыйнау һәм һынау урыны*)

**СТЕ́НКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **стена́** **2.** (*боковая сторона полого предмета*) сит, ҡыр, яҡ; **сте́нки кастрю́ли** кәстрүл сите **3.** *анат.* көп; **сте́нки желу́дка** ашҡаҙандың көбө **4.** (*комплект мебели, сконструированный для размещения вдоль стены квартиры*) стенка ♦ **гимнасти́ческая сте́нка**; **(шве́дская) сте́нка** *спорт.* гимнастик стенка

**СТЕННО́Й,** -ая, -ое **1.** стена ...ы; **стенны́е часы́** стена сәғәте **2.** (*выполненный на стене*) стенаға төшөрөлгән, стеналағы, стена ...ы; **стенна́я ро́спись** стенаға төшөрөлгән рәсем

**СТЕНОБИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое *ист.* стена вата (емерә) торған; **стенобитное ору́дие** стена вата торған ҡорал

**СТЕНОВО́Й,** -ая, -ое *спец.* стена ҡороу өсөн; **стеново́й кирпи́ч** стена ҡороу өсөн кирбес

**СТЕНОГРА́ММА** *ж* стенограмма (*телмәрҙе айырым билдәләр менән яҙыу*)

**СТЕНО́ГРАФ** *м* стенограф (*стенография ысулы менән яҙыусы*)

**СТЕНОГРАФИ́РОВАТЬ** *несов. что* стенографиялау, стенография менән яҙыу

**СТЕНОГРАФИ́СТ** *м* и **СТЕНОГРАФИ́СТКА** *ж* стенографист

**СТЕНОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** стенография ...ы; **стенографи́ческий алфави́т** стенография алфавиты **2.** стенографик; **стенографи́ческий отчёт** стенографик отчёт

**СТЕНОГРА́ФИЯ** *ж* стенография (*телмәрҙе айырым билдәләр, ҡыҫҡартмалар менән яҙыу ысулы*)

**СТЕНОКАРДИ́Я** *ж*; *мед.* йөрәк өйәнәге, стенокардия

**СТЕНОПИ́СНЫЙ,** -ая, -ое стенаға рәсем (биҙәк) төшөрөү ...ы, стена биҙәү ...ы; **стенопи́сное иску́сство** стена биҙәү сәнғәте

**СТЕ́НОПИСЬ** *ж* стенопись (*стенаға рәсем төшөрөү сәнғәте*)

**СТЕПЕ́ННОСТЬ** *ж* олпатлылыҡ, һапалылыҡ

**СТЕПЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*рассудительный, серьёзный*) олпатлы, һапалы; **степе́нный челове́к** олпат кеше **2.** (*свойственный такому человеку*) сабыр, тыйнаҡ; **степе́нное поведе́ние** сабыр холоҡ

**СТЕ́ПЕНЬ** *ж*; *в разн. знач.* дәрәжә; **возвести́ в сте́пень** *мат.* дәрәжәгә күтәреү; **учёная сте́пень** ғилми дәрәжә; **дипло́м тре́тьей сте́пени** өсөнсө дәрәжәле диплом; **дости́чь высо́ких степене́й** юғары дәрәжәләргә ирешеү ♦ **сте́пени сравне́ния** *грам.* сағыштырыу дәрәжәләре; **ни в како́й (мале́йшей) сте́пени** бөтөнләй, бөтөнләйгә

**СТЕПНО́Й,** -ая, -ое дала ...ы, далалағы; **степна́я расти́тельность** дала үҫемлектәре; **степны́е райо́ны** дала районы

**СТЕПНЯ́К** *м* **1.** дала кешеһе, далала йәшәүсе **2.** (*лошадь, разводимая в степи*) дала аты **3.** (*степная птица*) дала ҡошо

**СТЕПЬ** *ж* **1.** *геогр.* дала; **ковы́льная степь** ҡылғанлы дала **2.** *уст.* (*пустыня*) сүл

**СТЕРВЕНЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* ярһыу, ҡоторонноу, сығырҙан сығыу, ныҡ асыу килеү

**СТЕРВЯ́ТНИК** *м* үләкһә бөркөтө, ҡарағош

**СТЕРЕОМАГНИТОФО́Н** *м* стереомагнитофон

**СТЕРЕОМЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое стереометрик, стереометрия ...ы; **стереометри́ческая зада́ча** стереометрик мәсьәлә

**СТЕРЕОМЕ́ТРИЯ** *ж* стереометрия (*геометрияның бер бүлеге*)

**СТЕРЕОСКО́П** *м* стереоскоп (*оптик прибор*)

**СТЕРЕОСКОПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое стереоскопик; **стереоскопи́ческое кино́** стереоскопик кино

**СТЕРЕОТИ́П** *м* стереотип (*баҫма ысулы*)

**СТЕРЕОТИ́ПНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *типогр.* стереотип, стереотиптан баҫылған; **стереоти́пное изда́ние** стереотип баҫма **2.** *перен.* күп ҡабатланған, бер үк төрлө, үҙгәрешһеҙ; **стереоти́пная фра́за** күп ҡабатланған фраза

**СТЕРЕОФОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое стереофоник; **стереофони́ческая аппарату́ра** стереофоник аппаратура

**СТЕРЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*вытереть*) һөртөү, һөртөп алыу; **стере́ть пыль** туҙанды һөртөп алыу **2.** (*уничтожить*) бөтөрөү, юйыу; **стере́ть рису́нок** рәсемде юйыу **3.** *перен.* (*изгладить*) юйыу, юҡҡа сығарыу, юғалтыу; **вре́мя стёрло воспомина́ния** ваҡыт хәтирәләрҙе юйҙы **4.** (*повредить трением*) ҡырҙырыу, өйкәтеү, ҡырылыу, өйкәлеү; **стере́ть но́гу** аяҡты ҡырҙырыу **5.** (*измельчить*) (иҙеп) онтаҡлау, онтаҡ итеү; **стере́ть мел в порошо́к** аҡбурҙы (ыуып) онтаҡлау; **стере́ть кра́ски** буяуҙарҙы иҙеү ♦ **стере́ть в порошо́к** көлөн күккә осороу; **стере́ть с лица́ земли́** *см.* **лицо́**

**СТЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һөртөлөү, яғылыу, һөртөлөп (яғылып) бөтөү; **пу́дра стёрлась** пудра һөртөлөп бөткән **2.** ҡырылыу, ҡырылып бөтөү, ашалыу, ашалып бөтөү, юйылыу; **подо́шва о́буви стёрлась** аяҡ кейеменең табаны ашалған; **на́дпись на ка́мне стёрлась** таштағы яҙыу юйылған **3.** *перен.* (*исчезнуть, изгладиться*) юйылыу, иҫтән сығыу; **стере́ться в па́мяти** онотолоу, иҫтән сығыу

**СТЕРЕ́ЧЬ** *несов. кого-что* **1.** (*охранять*) һаҡлау, ҡарауыллау, ҡарау; **стере́чь дом** өйҙө һаҡлау; **стере́чь огоро́д** баҡсаны һаҡлау **2.** (*подстерегать*) һағалау, аңдыу; **стере́чь зве́ря** йыртҡысты аңдыу

**СТЕРЕ́ЧЬСЯ** *несов. страд. от* **стере́чь**

**СТЕ́РЖЕНЬ** *м* **1.** кендек, күсәр, стержень; **сте́ржень по́ршня** бешкәк кендеге **2.** үҙәк; **сте́ржень ствола́ де́рева** ағас олононоң үҙәге **3.** *чего*; *перен.* үҙәк, нигеҙ; **сте́ржень иссле́дования** тикшеренеүҙең нигеҙе

**СТЕРЖНЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** стерженлы; **стержнево́й трансформа́тор** стерженлы трансформатор **2.** *прям., перен.* үҙәк, төп; **стержнева́я пробле́ма** үҙәк проблема; **стержнево́й ко́рень куста́рника** ҡыуаҡтың үҙәк тамыры

**СТЕРИЛИЗА́ТОР** *м* стерилизатор (*стерилләү аппараты*)

**СТЕРИЛИЗА́ЦИЯ** *ж* стерилизация, стерилләү

**СТЕРИЛИЗОВА́ТЬ** *сов., несов.* **1.** *что* (*сделать стерильным*) стерилләү, стерилизациялау **2.** *кого-что*; *мед.* (*сделать неспособным к деторождению*) стерилләү, бестереү

**СТЕРИ́ЛЬНОСТЬ** *ж* стериль булыу, стериллек

**СТЕРИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** стерилле, стериль, йоғошһоҙландырылған; **стери́льный бинт** стерилле бинт **2.** *биол.* стериль (*үрсеү һәләте булмаған*); **стери́льная кле́тка** стериль күҙәнәк

**СТЕ́РЛИНГ** *м* стерлинг (*Англияның көмөш һәм алтын тәңкәләренең законлы стандарты*) ♦ **фунт сте́рлингов** *см.* **фунт** II

**СТЕ́РЛЯДЬ** *ж* сөгә, уҡбалыҡ

**СТЕРЛЯ́ЖИЙ,** -ья, -ье **1.** сөгә ...ы, уҡбалыҡ ...ы; **стерля́жья икра́** сөгә ыуылдырығы **2.** сөгә балығы ...ы, уҡбалыҡ ...ы, сөгә балығынан (уҡбалыҡтан) бешерелгән; **стерля́жья уха́** уҡбалыҡ һурпаһы

**СТЕРНЯ́** и **СТЕРНЬ** *ж* **1.** (*сжатое поле*) урылған баҫыу **2.** (*остатки жнивья на корню*) ҡамыл, сүкер

**СТЕРПЕ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* сыҙау, түҙеү, сыҙап (түҙеп) тороу; **стерпе́ть боль** ауыртыуға түҙеү; **стерпе́ть оби́ду** рәнйетеүгә түҙеү

**СТЁРТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **стере́ть** **2.** *прил.* (*повреждённый трением*) ашалған, ҡырылған, өйкәлгән; **стёртая моне́та** шымарған тәңкә **3.** *прил., перен.* күп ҡабатланған, күп сәйнәлгән; **стёртые фра́зы** күп ҡабатланған фразалар

**СТЕСА́ТЬ** *сов. что* сутлау, юныу, сутлап (юнып) төшөрөү (сығыу); **стеса́ть брёвна** бүрәнәләрҙе сутлап сығыу

**СТЕСНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **стесни́ть** — **стесня́ть, стесни́ться** — **стесня́ться** 3; **стесне́ние в груди́** күкрәк ҡыҫыу **2.** (*ощущение неловкости*) тартыныу, оялыу; **без стесне́ния** тартынмайынса, оятһыҙ рәүештә

**СТЕСНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **стесни́ть** **2.** *прил.* ҡыҫынҡы, ҡыйын; **стеснённые обстоя́тельства** ҡыҫынҡы хәлдәр

**СТЕСНИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* оялсанлыҡ, тартыныусанлыҡ; **ему́ прису́ща стесни́тельность** уға оялсанлыҡ хас

**СТЕСНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое (*застенчивый*) оялсан, оялыусан, тартыныусан

**СТЕСНИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*сжать*) ҡыҫыу, ҡыҫырыҡлау **2.** (*заставить потесниться, жить теснее*) ҡыҫыу, ҡыҫырыҡлау, уңайһыҙлау **3.** (*лишить свободы действия*) ҡамасаулау, мәшәҡәт тыуҙырыу, мәшәҡәтләү **4.** (*ограничить кого-л. в чём-л.*) ҡыҫыу, сикләү; **стесни́ть себя́ в расхо́дах** сығымдарҙа үҙеңде ҡыҫыу **5.** (*сдавить грудь, горло*) ҡыҫыу; **стесни́ть грудь** күкрәк ҡыҫыу

**СТЕСНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*тесно сдвинуться*) ҡыҫылыу, тығыҙланыу, ҡыҫылып (тығыҙланып) китеү **2.** *разг.* (*ограничить себя в чём-л.*) ҡыҫылыу, үҙен ҡыҫыу (сикләү) **3.** (*о дыхании*) ҡыҫылыу, тарайыу

**СТЕСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **стесни́ть**

**СТЕСНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **стесни́ться 2.** *кого-чего* и *без доп.* (*смущаться*) тартыныу; **стесня́ться петь** йырларға тартыныу **3.** *страд. от* **стесня́ть**

**СТЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **стеса́ть**

**СТЕТОСКО́П** *м* стетоскоп (*һулышты һәм йөрәк тибешен тыңлау приборы*)

**СТЕЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сте́чься** 1; **2.** (*скопление*) йыйылыу, йыйылып китеү; **большо́е стече́ние наро́да** халыҡ күпләп йыйылыу **2.** бергә тура килеү, тупланыу; **стече́ние обстоя́тельств** төрлө хәлдәрҙең бергә тура килеүе

**СТЕЧЬ** *сов.* ағып төшөү, йыйылыу; **вода́ стекла́ в кана́ву** һыу канауға ағып төштө

**СТЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** (*о ручьях и т.п.*) ағып килеп ҡушылыу, ағып төшөү; **ручьи́ стекли́сь в ре́ку** гөрләүектәр йылғаға ағып төштө **2.** *перен.* ағылыу, йыйылыу; **на пло́щадь стекло́сь мно́го наро́ду** майҙанға күп халыҡ ағылды

**СТИЛЕ́Т** *м* өс ҡырлы хәнйәр

**СТИЛИЗА́ТОР** *м* стилизатор (*оҫта стилләштереүсе*)

**СТИЛИЗА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое стилизатор ...ы, оҫта стилләштереү ...ы; **стилиза́торский приём** оҫта стилләштереү алымы

**СТИЛИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** (*подражание*) стилизация, стилләштереү **2.** (*произведение, представляющее собой подражание какому-л. стилю*) стилләштерелгән әҫәр (*берәй стилгә һалынған*)

**СТИЛИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. что* стилләштереү, стилгә һалыу

**СТИЛИ́СТ** *м* стилист (*оҫта яҙыусы*)

**СТИЛИ́СТИКА** *ж* стилистика (**1.** *телмәр стилдәре тураһындағы фән* **2.** *әҙәбиәт теорияһының художестволы әҫәр теле үҙенсәлеген һәм тасуирлау сараларын өйрәнә торған бүлеге*)

**СТИЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое стилистик, стилистика ...ы, стиль ...ы; **стилисти́ческие осо́бенности** стилистик үҙенсәлектәр

**СТИЛЬ I** *м*; *в разн. знач.* стиль; **готи́ческий стиль** готик стиль; **газе́тный стиль** гәзит стиле; **стиль руково́дства** етәкселек итеү стиле; **стиль писа́теля** яҙыусы стиле; **рабо́тать над сти́лем** стилде эшкәртеү; **костю́м в англи́йском сти́ле** инглиз стилендәге костюм

**СТИЛЬ II** *м* (*способ летоисчисления*) стиль (*йыл иҫәбе төрө*); **но́вый стиль** яңы стиль; **по ста́рому сти́лю** иҫке стиль буйынса

**СТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое стилле, билдәле бер стилдә -ған/-гән; **сти́льная ме́бель** стилле өй йыһазы

**СТИ́МУЛ** *м* стимул, дәрт, дәртләндереү; **мора́льный сти́мул** мораль дәртләндереү; **материа́льный сти́мул** матди дәртләндереү

**СТИМУЛИ́РОВАНИЕ** *с см.* **стимули́ровать**

**СТИМУЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* дәртләндереү, стимул булып тороу (биреү)

**СТИМУЛЯ́ТОР** *м*; *спец.* стимулятор, көс биреүсе; **стимуля́тор ро́ста расте́ний** үҫемлектәргә үҫергә көс биреүсе

**СТИПЕНДИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое стипендия ...ы; **стипендиа́льный фонд** стипендия фонды

**СТИПЕНДИА́Т** *м* и **СТИПЕНДИА́ТКА** *ж* стипендиат, стипендия алыусы; **президе́нтский стипендиа́т** президент стипендияһын алыусы

**СТИПЕ́НДИЯ** *ж* стипендия; **получа́ть стипе́ндию** стипендия алыу

**СТИРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кер ...ы, кер йыуыу ...ы, кер йыуа торған; **стира́льная маши́на** кер йыуыу машинаһы; **стира́льный порошо́к** кер йыуыу порошогы

**СТИ́РАНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*выстиранный*) йыуған, йыуылған; **сти́раное бельё** йыуылған кер **2.** (*не новый*) йыуылған, кейеп йыуылған, кейелгән; **сти́раное пла́тье** йыуылған күлдәк

**СТИРА́ТЬ I** *несов. см.* **стере́ть**

**СТИРА́ТЬ II** *несов. что* и *без доп.* йыуыу, кер йыуыу; **стира́ть бельё** кер йыуыу

**СТИРА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **стере́ться 2.** *страд. от* **стира́ть** I

**СТИРА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** (*поддаваться стирке*) йыуылыу, йыуылып бөтөү, йыуылып алыныу **2.** *разг.* (*находиться в стирке*) йыуыуҙа булыу, йыуыуға бирелеү **3.** *страд. от* **стира́ть** II

**СТИ́РКА** *ж см.* **стира́ть** II

**СТИ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **сти́снуть**

**СТИ́СКИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сти́снуться 2.** *страд. от* **сти́скивать**

**СТИ́СНУТЬ** *сов. кого-что*; *в разн. знач.* ҡыҫыу; **сти́снуть ру́ку** ҡулды ҡыҫыу ♦ **сти́снуть в объя́тиях** ҡосаҡҡа ҡыҫыу; **сти́снув зу́бы (сде́лать)** теште ҡыҫып, үҙеңде ҡулға алып

**СТИ́СНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡыҫылыу; (*о губах*) ҡымтылыу; (*о пальцах*) йомарланыу

**СТИХ I** *м* **1.** *мн.* **стихи́** шиғыр; **стихи́ о Салава́те Юла́еве** Салауат Юлаев тураһында шиғырҙар; **чита́ть стихи́** шиғыр уҡыу **2.** (*короткий абзац в стихотворном произведении*) бүлексә ♦ **бе́лые стихи́** *см.* **бе́лый**

**СТИХ II: стих нашёл**: 1) (*о настроении*) көйө булыу, көйөнә килеү; 2) (*о сумасбродстве, дури, овладевшими кем-л.*) дыуамалланыу

**СТИХА́ТЬ** *несов. см.* **сти́хнуть**

**СТИХИ́ЙНОСТЬ** *ж* **1.** стихиялылыҡ (*емергес тәбиғәт көстәренә хас булыу*) **2.** ойошмағанлыҡ, үҙенән-үҙе булыу, стихиялылыҡ

**СТИХИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** стихиялы (*емергес тәбиғәт көстәренә хас*); **стихи́йное бе́дствие** афәт, стихиялы бәлә-ҡаза **2.** стихиялы, ойошторолмаған; **стихи́йное восста́ние** стихиялы күтәрелеш

**СТИХИ́Я** *ж* **1.** (*неуправляемое явление природы*) тәбиғи көстәр, стихия; (*общественной жизни*) стихия; **во́дная стихи́я** һыу стихияһы; **стихи́я инфля́ции** инфляция стихияһы **2.** *кого-чего, какая*; *перен.* (*привычная среда, окружение*)

күнегелгән мөхит, өйрәнгән тормош; **попа́сть в родну́ю стихи́ю** күнегелгән мөхиткә эләгеү

**СТИ́ХНУТЬ** *сов.*; *в разн. знач.* тымыу, шымыу, туҡтау; **ве́тер стих** ел тымды; **пе́сня сти́хла** йыр туҡтаны; **шаги́ сти́хли** аяҡ тауыштары тымды

**СТИХОВЕ́ДЕНИЕ** *с* (*наука о стихосложении*) шиғриәт ғилеме

**СТИХОВЕ́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое шиғриәткә ҡараған, шиғриәт тураһындағы; **стихове́дческие изыска́ния** шиғриәт тураһындағы тикшеренеүҙәр

**СТИХОВО́Й,** -ая, -ое шиғри; **стихова́я речь** шиғри телмәр

**СТИХОПЛЁТ** *м*; *разг.*, *пренебр.* шиғыр этмәләүсе, шағир йораты

**СТИХОСЛОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** (*сочинение стихов*) шиғыр сығарыу (яҙыу) **2.** *лит.* (*построение стихотворной речи*) шиғыр төҙөлөшө

**СТИХОТВОРЕ́НИЕ** *с* шиғыр; **сочини́ть стихотворе́ние** шиғыр яҙыу

**СТИХОТВО́РЕЦ** *м* шағир (*шиғыр яҙыусы*)

**СТИХОТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шиғыр ...ы; **стихотво́рный разме́р** шиғыр үлсәүе, шиғыр вәзене **2.** (*написанный стихами*) теҙмә, шиғри

**СТЛАТЬ** *несов. что* йәйеү, түшәү, һалыу; **стлать ковёр** келәм түшәү; **стлать лён** етен түшәү

**СТЛА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** йәйелеү, түшәлеү; **доро́га сте́лется** юл йәйелеп ята **2.** (*о растениях*) түшәлеү, йәйелеү; **плющ сте́лется по земле́** үрмәле үлән ергә түшәлә **3.** (*распространяться*) йәйелеү, таралыу, ҡаплау; **тума́н сте́лется по реке́** томан йылға буйлап тарала **4.** *страд. от* **стлать**

**СТО** *числ.* йөҙ; **сто раз** йөҙ тапҡыр (мәртәбә); **сто рубле́й** йөҙ һум ♦ **на все сто** бик шәп, бына тигән

**СТОГ** *м* кәбән; **стог се́на** бер кәбән бесән; **мета́ть стог** кәбән һалыу ♦ **как иго́лка в стогу́ се́на** һыуға батҡандай юҡ булыу

**СТОГОВА́ТЬ** *несов. что*; *с.-х.* кәбән һалыу (ҡойоу)

**СТОГОВО́Й,** -ая, -ое кәбән ...ы, кәбәндәге; **стогово́е се́но** кәбәндәге бесән

**СТОГОМЕТА́НИЕ** *с* кәбән һалыу (ҡойоу)

**СТОГОМЕТА́ТЕЛЬ** *м* кәбән һалыу (ҡойоу) машинаһы, кәбән һалғыс (ҡойғос)

**СТО́ИК** *м* стоик (**1.** *стоицизм фәлсәфәһен яҡлаусы* **2.** *күсм. ныҡ характерлы, ныҡлы кеше*)

**СТО́ИМОСТЬ** *ж* **1.** *эк.* ҡиммәт; **ме́новая сто́имость** алмашыу ҡиммәте **2.** (*цена*) хаҡ, баһа; **сто́имость биле́та** билет хаҡы; **сто́имость перево́зки** ташыу хаҡы; **прода́жная сто́имость** һатыу хаҡы ♦ **приба́вочная сто́имость** өҫтәлмә ҡиммәт

**СТО́ИТЬ** *несов.* **1.** (*иметь цену*) тороу, төшөү, хаҡы тороу; **биле́т сто́ит до́рого** билет хаҡы ҡиммәт (тора) **2.** *кого-чего* (*быть достойным*) лайыҡ (булыу), тороу; **сто́ит внима́ния** иғтибарға лайыҡ **3.** (*требовать каких-л. затрат, усилий*) тороу; **э́то ему́ ничего́ не сто́ит** был уға бер ни тормай; **не сто́ит никако́го труда́** һис бер ни түгел, һис бер ни тормай **4.** *с неопр. безл.* (*надо, следует*) -ға/-гә кәрәк (була, ярай, мөмкин); **э́ту кни́гу сто́ит проче́сть** был китапты уҡып сығырға була **5.** *с неопр. безл.* -дымы/-деме, -рға ғына/-ргә генә кәрәк (етә); **сто́ит ему́ то́лько напо́мнить** уның иҫенә төшөрөргә генә кәрәк ♦ **не сто́ит** бер ни түгел (*рәхмәткә яуап рәүешендә*); **ничего́ не сто́ит** *с неопр.* бер ҡыйынлығы ла юҡ; **игра́ не сто́ит свеч** бер тинлек ҡуян, ун тинлек зыян; **овчи́нка вы́делки не сто́ит** *см.* **овчи́нка**; **дёшево сто́ить** *см.* **дёшево**; **мизи́нца не сто́ит** *см.* **мизи́нец**; **вы́еденного яйца́ не сто́ит** *см.* **вы́есть**; **гроша́ ме́дного (ло́маного) не сто́ит** *см.* **грош**

**СТОИЦИ́ЗМ** *м* **1.** *филос.* стоицизм (*антик фәлсәфәләге ағым*) **2.** *перен.* ныҡлыҡ, түҙемлек, сыҙамлылыҡ

**СТОИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *филос.* стоик(тар) ...ы, стоик; **стои́ческая филосо́фия** стоиктар фәлсәфәһе **2.** *перен.* стоиктарса, стоиктарға хас, ныҡлы, түҙем, сыҙам; **стои́ческий хара́ктер** ныҡлы характер; **стои́ческое споко́йствие** стоиктарса тыныслыҡ

**СТО́ЙБИЩЕ** *с* **1.** (*становище кочевников Сибири*) тораҡ, йәшәгән урын, туҡталыу урыны **2.** саңлау, туплау (*көтөүлектәге мал торған урын*)

**СТО́ЙКА I** *ж* **1.** (үрә, ҡатып) тороу **2.** *спорт.* стойка, баш түбән тороу **3.** *охот.* тын ҡалыу, (хәрәкәтһеҙ) ҡатыу (*һунар эте тураһында*); **соба́ка сде́лала сто́йку** эт ҡатып ҡалды ♦ **сто́йка сми́рно** *воен.*, *спорт.* туп-тура (смирно) баҫып тороу

**СТО́ЙКА II** *ж* **1.** (*вертикальный брус, подпорка*) терәк (*механизмдарҙа*); терәү таяу (*ҡоролмаларҙа*) **2.** (*стоячий воротник*) ултырма яға; **руба́шка со сто́йкой** ултырма яғалы күлдәк

**СТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое **1.** тотороҡло, ныҡ(лы); **сто́йкий за́пах** тотороҡло еҫ; **сто́йкая кра́ска** тотороҡло буяу; **сто́йкий кирпи́ч** ныҡ кирбес **2.** *перен.* ныҡлы, ҡаҡшамаҫ, түҙем, түҙемле, тотанаҡлы, сабыр, бирешмәҫ; **сто́йкий хара́ктер** тотанаҡлы холоҡ; **сто́йкий челове́к** бирешмәҫ кеше

**...СТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "сыҙам", "түҙем", "сыҙамлы", "түҙемле" мәғәнәләрен биргән икенсе өлөшө, мәҫ.*, **огнесто́йкий** утҡа бирешмәҫ, утҡа сыҙамлы

**СТО́ЙКОСТЬ** *ж* тотороҡлолоҡ, ныҡлыҡ, бирешмәүсәнлек

**СТО́ЙЛО** *с* аран (*аҙбарҙа бер генә ат йәки һыйыр өсөн эшләнгән урын*)

**СТО́ЙЛОВЫЙ,** -ая, -ое аҙбарҙа аҫрау ...ы; **сто́йловое содержа́ние скота́** малды аҙбарҙа аҫрау; **сто́йловый пери́од** (малды) аҙбарҙа аҫрау осоро

**СТОЙМЯ́** *нареч.* аяҡ үрә, аяҡ өҫтө, баҫтырып; **ста́вить стоймя́** аяҡ өҫтө (баҫтырып) ҡуйыу

**СТОК** *м* **1.** *см.* **стека́ть** — **стечь 2.** *гидр.* аҡма (*билдәле ваҡыт эсендә күлгә, йылғаға, диңгеҙгә ағып төшкән һыу күләме*) **3.** (*канава, труба*)

улаҡ, торба (*һыу ағыу өсөн*) **4.** ағыҙылған һыуҙар; **сто́ки промы́шленных предприя́тий** сәнәғәт предприятиеларынан ағыҙылған һыуҙар

**СТОКРА́Т** *нареч.*; *книжн.* йөҙ тапҡыр, йөҙ мәртәбә, йөҙләтә

**СТОКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*увеличенный в сто раз*) йөҙ тапҡыр артыҡ, йөҙгә арттырып, йөҙләтә; **в стокра́тном разме́ре** йөҙ тапҡыр арттырылған күләмдә **2.** (*многократный*) күп тапҡыр (мәртәбә) ҡабатланған

**СТОЛ** *м* **1.** өҫтәл; **кру́глый стол** түңәрәк өҫтәл; **обе́денный стол** аш өҫтәле; **пи́сьменный стол** яҙыу өҫтәле; **я́щик стола́** өҫтәл тартмаһы **2.** табын, өҫтәл; **собира́ть на стол** өҫтәл әҙерләү; **приглаша́ть к столу́** өҫтәл янына саҡырыу **3.** (*вид еды, пищи*) ашау, туҡланыу; **вегетариа́нский стол** итһеҙ ашау; **мясно́й стол** ит ашау **4.** *чего, какой* өҫтәл, бүлек; **а́дресный стол** адрестар өҫтәле; **стол нахо́док** табылған нәмәләр өҫтәле ♦ **за кру́глым столо́м** *см.* **кру́глый**; **зелёный стол** йәшелсә менән туҡланыу

**СТОЛБ** *м*; *прям., перен.* бағана; **телегра́фный столб** телеграф бағанаһы; **верстово́й столб** саҡрым бағанаһы; **водяно́й столб** һыу бағанаһы; **столб пы́ли** туҙан бағанаһы; **дымово́й столб** төтөн бағанаһы ♦ **пригвозди́ть к позо́рному столбу́** оятҡа ҡалдырыу; **стоя́ть столбо́м** бағаналай ҡатып ҡалыу; **позвоно́чный столб** умыртҡа бағанаһы; **дым столбо́м** *см.* **дым**

**СТОЛБЕНЕ́ТЬ** *несов.* бағаналай ҡатыу, ҡатып ҡалыу, бағана булып ҡатыу

**СТОЛБЕ́Ц** *м* бағана (*гәзит, журнал битендә*); **журна́льный лист в два столбца́** ике бағаналы журнал бите

**СТО́ЛБИК** *м* **1.** *уменьш. от* **столб** **2.** (*стопка*) өйөм; **сто́лбик моне́т** тимер аҡсалар өйөмө **3.** (*масса вещества, заключённая в длинную, узкую трубку*) бағана; **сто́лбик рту́ти** терегөмөш бағанаһы **4.** *см.* **столбе́ц**

**СТОЛБНЯ́К** *м* **1.** тартышыу, ҡарыштырыу ауырыуы **2.** *разг.* ҡатыу, һын (шаҡ) ҡатыу; **на него́ нашёл столбня́к** унының һыны ҡатты

**СТОЛБНЯ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тартышыу ...ы, ҡарыштырыу ...ы; **столбня́чная па́лочка** тартышыу таяҡсаһы

**СТОЛБОВО́Й I,** -ая, -ое бағана ...ы; **столбова́я опо́ра** бағана терәге ♦ **столбова́я доро́га** *уст.* саҡрым бағаналы (оло) юл

**СТОЛБОВО́Й II,** -ая, -ое *ист.* атаҡлы (затлы) нәҫелдән (сыҡҡан), яҡшы тоҡомдан; **столбово́й дворяни́н** атаҡлы нәҫелдән сыҡҡан дворянлы

**СТОЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*век*) быуат; **двадца́тое столе́тие** егерменсе быуат **2.** (*годовщина*) йөҙ йыл, йөҙ йыллыҡ; **отмеча́ть столе́тие писа́теля** яҙыусының йөҙ йыллығын билдәләү

**СТОЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** йөҙ йыллыҡ; **столе́тнее госпо́дство** йөҙ йыллыҡ хакимлыҡ **2.** йөҙ йәшлек, йөҙ йәшәгән, йөҙ йәшәр; **столе́тний ста́рец** йөҙ йәшәр ҡарт; **столе́тний дуб** йөҙ йәшәгән имән **3.** йөҙ йыллыҡ; **столе́тний юбиле́й** йөҙ йыллыҡ юбилей ♦ **Столе́тняя война́** *ист.* Йөҙ йыллыҡ һуғыш

**СТОЛЕ́ТНИК** *м* йөҙ йәшәр (*сәнскеле булмә гөлө*)

**СТОЛИ́ЦА** *ж* баш ҡала

**СТОЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** баш ҡала ...ы, баш ҡалала ...ы; **столи́чные у́лицы** баш ҡала урамдары; **столи́чный жи́тель** баш ҡалала йәшәүсе **2.** баш ҡала ...ы, баш ҡалаға хас, баш ҡала кешеһенә хас; **столи́чные мо́ды** баш ҡала модаһы

**СТОЛКНОВЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **столкну́ться** 1, 2; **2.** (*конфликт, противоречие*) ҡаршылашыу, ҡаршылыҡ тыуҙырыу **3.** (*стычка, схватка*) бәрелеш, бәрелешеү; **вооружённое столкнове́ние** ҡоралды бәрелеш

**СТОЛКНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** этеү, этеп ебәреү, этеп (төртөп) төшөрөү; **столкну́ть ло́дку в во́ду** кәмәне һыуға этеп төшөрөү; **столкну́ть с ле́стницы** баҫҡыстан төртөп төшөрөү **2.** бәрҙереү, бәрелештереү; **столкну́ть лба́ми** маңлайҙары менән бәрелештереү **3.** *перен.* бәрелештереү; **столкну́ть интере́сы** мәнфәғәттәрҙе бәрелештереү **4.** *с кем* (*заставить встретиться*) осраштырыу, ҡара-ҡаршы килтереү, йөҙгә-йөҙ килтереү; **столкну́ть с враго́м** дошман менән йөҙгә-йөҙ килтереү **5.** *с чем*; *перен.* дусар итеү; **столкну́ть с тру́дностями** ҡыйынлыҡтарға дусар итеү

**СТОЛКНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*наткнуться друг на друга*) бәрелешеү, бер-береңә бәрелеү; **льди́ны столкну́лись** боҙҙар бәрелеште **2.** *перен.* тура килмәү; **столкну́ться во взгля́дах на пробле́му** проблемаға бәйле ҡараштарҙың тура килмәүе **3.** *с кем* (көтмәгәндә) осрашыу, бәрелешеү; **столкну́ться со ста́рым дру́гом** көтмәгәндә элекке дуҫ менән осрашыу **4.** *с чем*; *перен.* (*узнать, испытать*) юлығыу, тура килеү, дусар булыу; **столкну́ться с тру́дностями** ҡыйынлыҡтарға юлығыу

**СТОЛКОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* уртаҡ тел табыу, килешеү; **столкова́ться ме́жду собо́й** үҙ-ара уртаҡ тел табыу

**СТОЛКО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **столкова́ться**

**СТОЛОВА́ТЬСЯ** *несов.* ашау, ашап-эсеү, туҡланыу

**СТОЛО́ВАЯ** *ж* **1.** (*комната в квартире*) аш бүлмәһе **2.** (*предприятие общепита*) ашхана

**СТОЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** өҫтәл ...ы; **столо́вая но́жка** өҫтәл аяғы **2.** аш ...ы; **столо́вая соль** аш тоҙо; **столо́вая ло́жка** аш ҡалағы; **столо́вый прибо́р** аш һауыт-һабаһы **3.** аш ...ы, ашай торған; **столо́вая свёкла** ашай торған сөгөлдөр

**СТОЛО́ЧЬ** *сов. что*; *разг.* төйөү, төйөп алыу; **столо́чь соль** тоҙ төйөү

**СТОЛО́ЧЬСЯ** *сов.*; *разг.* төйөлөү

**СТОЛП** *м* **1.** *уст. см.* **столб** **2.** *перен.* таяныс, терәк; **столпы́ о́бщества** йәмғиәттең терәктәре

**СТОЛПИ́ТЬСЯ** *сов.* йыйылыу, йыйылышыу, өйөлөшөү

**СТОЛПОТВОРЕ́НИЕ** *с*; *разг.* сиктән тыш шау-шыу, мәхшәр, ҡиәмәт

**СТОЛЬ** *нареч.* шул тиклем, ул тиклем (ҡәҙәр, хәтле); **э́то не столь уж ну́жно** был ул хәтле үк кәрәк түгел

**СТО́ЛЬКО** *мест.* и *нареч.* шул тиклем (саҡлы, ҡәҙәр, хәтле), был тиклем (саҡлы, ҡәҙәр, хәтле); **где ты был сто́лько вре́мени?** һин шул тиклем ваҡыт ҡайҙа булдың?; **сто́лько мно́го!** шул тиклем күп!

**СТО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* баш ҡала ...ы

**СТОЛЯ́Р** *м* ағас эше оҫтаһы, балта оҫтаһы

**СТОЛЯ́РНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ағас эше менән шөғөлләнеү

**СТОЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое ағас, ағастан эшләнгән; **столя́рные изде́лия** ағас әйберҙәр, ағастан эшләнгән әйберҙәр ♦ **столя́рный клей** ағас елеме

**СТОМАТИ́Т** *м*; *мед.* ауыҙ шешеү, ауыҙ иҙелеү

**СТОМАТО́ЛОГ** *м* стоматолог (*стоматология белгесе*); **рабо́тать стомато́логом** стоматолог булып эшләү

**СТОМАТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое стоматология ...ы, стоматологик; **стоматологи́ческий каби́не́т** стоматология кабинеты

**СТОМАТОЛО́ГИЯ** *ж* стоматология (*медицинаның ауыҙ эсендәге ауырыуҙарҙы, яңаҡты, тештәрҙе өйрәнеү һәм дауалау бүлеге*)

**СТОН** *м* **1.** ыңғырашыу, ыңғыраш, ыңғырашыу тауышы **2.** *перен.* (*жалоба, сетование*) зар, зарланыу ♦ **стон стои́т**: 1) туҡтауһыҙ илау, ыңғырашыу, зарланыу; 2) (*о шуме, гуле*) шау-шыу, геүләү

**СТОНА́ТЬ** *несов.* **1.** ыңғырашыу; **стона́ть от бо́ли** ауыртыуҙан ыңғырашыу **2.** *перен., разг.* зарланыу; **стона́ть от го́ря** ҡайғынан зарланыу **3.** *перен.* (*страдать*) яфаланыу, иҙелеү ♦ **сто́ном стона́ть**: 1) бик ныҡ, оҙаҡ ыңғырашыу; 2) үтә ныҡ зарланыу; 3) оҙаҡ яфа сигеү, ыҙа сигеү

**СТОП** *межд.* **1.** (*команда*) туҡта, туҡтат, туҡтатырға **2.** *в знач. сказ.*; *разг.* туҡтаны, туҡтанылар; **е́дем и вдруг — стоп** китеп барабыҙ һәм ҡапыл туҡтаныҡ **3.** *в знач. сущ.* **стоп** *м нескл.* туҡтатыу; **сигна́л стоп** туҡтатыу сигналы

**СТОПА́ I** *ж* **1.** (*нижняя часть ноги*) табан, кәтмән **2.** *обычно мн.* **стопы́**; *трад.-поэт., книжн.* (*ноги*) аяҡ ♦ **идти́ по стопа́м** *чьим-л. кемдеңдер* юлынан барыу, үрнәк алыу

**СТОПА́ II** *ж*; *лит.* стопа (*ритмик быуын*)

**СТОПА́ III** *ж* **1.** бер өйөм, бер ҡосаҡ; **стопа́ книг** бер өйөм китап **2.** стопа, мең табаҡ (*ҡағыҙ иҫәпләү берәмеге*)

**СТО́ПКА I** *ж см.* **стопа́** III

**СТО́ПКА II** *ж* стопка (*бәләкәй генә стакан*)

**СТОП-КРА́Н** *м* стоп-кран; **нажа́ть на стоп-кра́н** стоп-кранға баҫыу

**СТО́ПОР** *м* стопор (*механизмды туҡтатыу өсөн әйләнмә*)

**СТО́ПОРИТЬ** *несов. что* и *без доп.* туҡтатыу; **сто́порить маши́ну** машинаны туҡтатыу

**СТО́ПОРИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*останавливаться — о машине*) туҡтау **2.** *перен., разг.* (*замедляться в развитии*) әкренәйеү, тотҡарланыу **3.** *страд. от* **сто́порить**

**СТО́ПОРНЫЙ,** -ая, -ое (машинаны) туҡтатыу ...ы; **сто́порный кран** туҡтатыу краны

**СТОПРОЦЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йөҙ процентлы; **стопроце́нтный соляно́й раство́р** йөҙ процентлы тоҙ иретмәһе **2.** йөҙ процент(ҡа); **стопроце́нтное выполне́ние пла́на** планды йөҙ процентҡа үтәү **3.** *разг.* ысын (мәғәнәһендә), ысын-ысындан; **стопроце́нтный иностра́нец** ысын мәғәнәһендәге сит ил кешеһе

**СТОПТА́ТЬ** *сов.* **1.** (*обувь*) тапап бөтөрөү, ҡыйыш баҫып боҙоу, ҡыйшайта баҫыу **2.** *разг.* (*вытоптать*) тапау, әрәм итеү

**СТОПТА́ТЬСЯ** *сов.* тапалыу, ҡыйыш баҫылып боҙолоу (*аяҡ кейеме тураһында*)

**СТОПУДО́ВЫЙ,** -ая, -ое йөҙ ботлоҡ (*ауырлыҡ*)

**СТОРГОВА́ТЬСЯ** *сов.* һатыулашыу, һатыулашып килешеү

**СТОРИ́ЦЕЙ** и **СТОРИ́ЦЕЮ** *нареч.*; *уст., книжн.* (*в сочетании с глаголами "дать", "воздать", "получить" и т.д.*) күпләтә, күп мәртәбә арттырып, йөҙ тапҡыр арттырып, йөҙләтә; **земля́ воздала́ стори́цею** ер йөҙләтә арттырып ҡайтарҙы

**СТО́РОЖ** *м* и *разг.* **СТОРОЖИ́ХА** *ж* ҡарауылсы, һаҡсы

**СТОРОЖЕВИ́К** *м*; *разг.* һаҡсы (ҡарауылсы) катер

**СТОРОЖЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡарауыл ...ы; **сторожева́я вы́шка** ҡарауыл вышкаһы **2.** *в знач. сущ.* **сторожево́й** *м* ҡарауылсы, һаҡсы; **меня́ть сторожевы́х** ҡарауылсыларҙы алыштырыу

**СТОРОЖИ́ТЬ** *несов. кого-что* ҡарауыллау, һаҡлау

**СТОРО́ЖКА** *ж* ҡарауыл өйө (аласығы)

**СТОРОНА́** *ж* **1.** яҡ, тараф, йүнәлеш; **в сто́рону ле́са** урман яғына; **подве́тренная сторона́** ышыҡ яҡ; **противополо́жные сто́роны** ҡаршы яҡтар; **со всех сторо́н** төрлө тарафтан **2.** сит, янъяҡ; **посмотре́ть в сто́рону** ситкә ҡарау; **по сторона́м доро́ги** юлдың ян-яғына **3.** *разг.* яҡ, юл, ил; **родна́я сторона́** тыуған яҡ; **чужа́я сторона́** сит яҡ **4.** яҡ, ян; **скали́стая сторона́ бе́рега** ярҙың ҡаялы яғы **5.** *мат.* яҡ, ҡыр; **сто́роны многоуго́льника** күпмөйөштөң ҡырҙары **6.** *прил.* яҡ, сифат; **худо́жественная сторона́ расска́за** хикәйәнең художество яғы **7.** *мн.* **сто́роны** яҡтар; **догова́ривающиеся сто́роны** килешеүсе яҡтар; **пре́ния сторо́н в суде́** судта яҡтарҙың һүҙе ♦ **быть на стороне́** *чьей берәйһе* яҡлы булыу; **стоя́ть в стороне́** *от кого-чего-л.*: 1) (кешеләрҙән) ситтә тороу; 2) (кешеләр менән) аралашмау, айырымланыу; **со стороны́** яғынан, тарафынан; **с одно́й стороны́ ..., с друго́й стороны́** *в знач. вводн. сл.*

бер яҡтан ..., икенсе яҡтан; **встать на сто́рону** *чью кемдеңдер* яғына сығыу, яҡлы булыу; **идти́ (отправля́ться) на все четы́ре сто́роны** дүрт яғы ҡибла

**СТОРОНИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*отодвигаться в сторону*) ситкә тайпылыу, юл биреү **2.** *кого-чего*; *перен.* ситтә тороу, ситләшеү, аралашмау, яҡын бармау (килмәү)

**СТОРО́ННИЙ,** -яя, -ее **1.** сит, ят **2.** сит, башҡа, бүтән

**СТОРО́ННИК** *м* и **СТОРО́ННИЦА** *ж* яҡлы, яҡлаусы, яғында тороусы, тарафдар; **сторо́нники ми́ра** тыныслыҡ яҡлы кешеләр

**СТОРУБЛЁВКА** *ж*; *разг.* йөҙ һумлыҡ (*аҡса*)

**СТОСКОВА́ТЬСЯ** *сов. о ком-чём, по кому-чему, по ком-чём*; *разг.* һағыныу, һағынып китеү (бөтөү)

**СТОЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*снять неровности*) сарлау, сарлап ҡуйыу, ҡайрау, ҡайрап алыу **2.** сарлап бөтөрөү, сарлап (ҡайрап) йоҡартыу; **сточи́ть нож** бысаҡты ҡайрап йоҡартыу

**СТОЧИ́ТЬСЯ** *сов.* сарлай-сарлай (ҡайрай-ҡайрай) йоҡарып (ашалып) бөтөү; **но́жик сточи́лся** бәке ҡайрай-ҡайрай йоҡарып бөттө

**СТО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ағып төшә торған, ағып төшөп йыйылған; **сто́чные во́ды** ағып төшөп йыйылған һыу **2.** һыу ағыҙа торған; **сто́чные тру́бы** һыу ағыҙа торған торбалар **3.** (*имеющий сток*) ағар, ағып сыға торған (ятҡан); **сто́чное о́зеро** ағар күл

**СТОШНИ́ТЬ** *сов. кого безл.* күңел болғаныу, ҡоҫоу

**СТО́Я** *нареч.* баҫып, аяҡ үрә; **чита́ть сто́я** аяҡ үрә уҡыу

**СТОЯ́К** *м* (*для опоры*) таяу, терәү (*бағана һ.б. кеүек*); (*для соединения*) торба

**СТОЯ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** тик торған, хәрәкәтһеҙ (*һыу, һауа һ.б.*); **стоя́лая вода́** торған һыу, үле һыу (*күл һ.б.*) **2.** оҙаҡ торған, ултырған; **стоя́лый мёд** ултырған бал **3.** (*застоялый*) оҙаҡ егелмәгән; **стоя́лый конь** оҙаҡ егелмәгән ат

**СТОЯ́НКА** *ж* **1.** туҡтау, туҡтап тороу, туҡталыу; **стоя́нка по́езда пять мину́т** поезд биш минутҡа туҡтай **2.** (*место*) туҡталыу урыны; **стоя́нка зимо́вщиков** ҡышлаусыларҙың туҡталыу урыны **3.** (*для транспорта*) туҡталҡа, туҡталыш; **стоя́нка трамва́ев** трамвайҙар туҡталышы **4.** тора(лар) (*боронғо кешеләр торған урын*); **стоя́нка ка́менного ве́ка** таш быуат торалары

**СТОЯ́ТЬ** *несов.* **1.** тороу, баҫып тороу; **стоя́ть у окна́** тәҙрә янында тороу **2.** (һаҡта) тороу; **стоя́ть в почётном карау́ле** почёт ҡарауылында тороу **3.** (*располагаться*) урынлашыу, туҡтау, туҡталыу; **стоя́ть ла́герем** лагерь булып урынлашыу; **ро́та стои́т в лесу́** рота урманда урынлашҡан **5.** *за кого-что*; *перен.* яҡлау; **стоя́ть за мир** тыныслыҡты яҡлау; **стоя́ть за пра́вду** дөрөҫлөктө яҡлау **6.** *за чем*; *перен.*, *разг.* (*с отрицанием*) тормау, ҡарамау; **не стоя́ть за цено́й** хаҡына ҡарамау **7.** (*быть, находиться*) тороу, үҫеп ултырыу; **берёза стои́т у до́ма** ҡайын өй янында тора **8.** *на чём* ҡуйылыу, ҡоролоу, һалыныу; **дом стои́т на фунда́менте** өй нигеҙгә һалынған **9.** ҡуйылыу, һалыныу, һуғылыу; **на бума́ге стои́т печа́ть** ҡағыҙға мисәт һуғылған **10.** туҡтау, туҡтап тороу, тороу; **по́езд до́лго стоя́л на ста́нции** поезд станцияла оҙаҡ торҙо **11.** туҡтау, йөрөмәү; **часы́ стоя́т** сәғәт туҡтаған **12.** *перен.* туҡталыу, туҡталып тороу; **рабо́та стои́т** эш туҡталды **13.** бар булыу, күренеү, тороу, ине; **луна́ стоя́ла высоко́ над до́мом** ай өй тапҡырында юғарыла күренә ине; **стоя́ла зима́** ҡыш ине **14.** *повел.* **сто́й(те)!** туҡта(ғыҙ)!, тороп тор(оғоҙ)! ♦ **стоя́ть во главе́** башында тороу, етәкселек итеү; **стоя́ть гру́дью** *см.* **грудь**; **стоя́ть как вко́панный** бағаналай (бағана кеүек) ҡатып тороу; **стоя́ть над душо́й** *см.* **душа́**; **стоя́ть на за́дних ла́пках** *см.* **ла́пка**; **стоя́ть на ло́жном пути́** яңылыш юлға баҫыу; **стоя́ть на пути́ (доро́ге, поперёк доро́ги)** юлына арҡыры төшөү; **стоя́ть на ра́вной ноге́** *с кем кем менәндер* тиңләшеү (тиң булыу); **стоя́ть на (свои́х, со́бственных) нога́х** аяғында ныҡ баҫып тороу (*тормошта ныҡлы урын биләү*); **стоя́ть на своём** үҙ һүҙен бирмәү; **стоя́ть на́смерть** йәнде аямау; **стоя́ть на стра́же** һаҡта (һағында) тороу; **стоя́ть одно́й ного́й в моги́ле (в гробу́)** *см.* **моги́ла**; **стоя́ть на хоро́шей (пра́вильной) доро́ге**; **стоя́ть на хоро́шем (пра́вильном) пути́** дөрөҫ юлда булыу; **стоя́ть на часа́х** ҡарауылда тороу; **стоя́ть поперёк го́рла** тамаҡҡа арҡыры тороу; **стоя́ть у вла́сти** власть башында тороу (булыу); **стоя́ть у воро́т (у поро́га)** яҡынлашып килеү, етеп килеү (*күбеһенсә тәбиғәт миҙгелдәре тураһында*); **стоя́ть за спино́й** *у кого кемдеңдер* артында тороу (аҫтыртын яҡлау, ярҙам итеү)

**СТОЯ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** текә, баҫып торған, ултырма; **стоя́чий воротни́к** ултырма яға **2.** (*не проточный*) аҡмаған, аҡмаҫ, бөркөү, үле; **стоя́чая вода́** үле һыу; **стоя́чий во́здух** бөркөү һауа

**СТО́ЯЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **сто́ить** **2.** *прил.*; *разг.* әһәмиәтле, лайыҡлы; **сто́ящее предложе́ние** әһәмиәтле тәҡдим; **сто́ящий челове́к** лайыҡлы кеше

**СТРАВИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*о животных*) һөсләтеү, һөскөртөү; **страви́ть соба́к** эттәрҙе һөсләтеү **2.** *перен.*, *разг.* (*подстрекнуть к спору, драке*) ҡотортоу, ара боҙоу, талаштырыу

**СТРА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **страви́ть**

**СТРА́ГИВАТЬ** *несов. см.* **стро́нуть**

**СТРА́ГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **стро́нуться** **2.** *страд. от* **стра́гивать**

**СТРАДА́** *ж* **1.** ураҡ, бесән, ураҡ (бесән) өҫтө (*йәйге ҡыҙыу эш ваҡыты*) **2.** *перен.* ҡыҙыу (ауыр) саҡ (ваҡыт, мәл)

**СТРАДА́ЛЕЦ** *м* и **СТРАДА́ЛИЦА** *ж* яфа сигеүсе, интегеүсе, нужа күреүсе

**СТРАДА́ЛЬЧЕСКИЙ,** -ая, -ое аҙаплы, ғазаплы, интеккән, яфаланған; **страда́льческий вид** ғазаплы төҫ

**СТРАДА́НИЕ** *с* ғазап, яфа, михнәт, ғазап (яфа) сигеү, михнәт күреү

**СТРАДА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст. см.* **страда́льческий 2.** *книжн.* ауырлыҡ күргән, интеккән **3.** *грам.* йүнәлеш, төр; **страда́тельное прича́стие** үткән заман сифат ҡылым; **страда́тельный зало́г** төшөм йүнәлеше

**СТРАДА́ТЬ** *несов.* **1.** *от чего, за кого-что* и *без доп.* интегеү, яфаланыу, ғазапланыу, аҙапланыу, ғазап сигеү, ғазап (яфа) сигеү (күреү); **страда́ть от головно́й бо́ли** баш ауырыуынан интегеү; **страда́ть от мы́сли, что** тип ғазапланыу, (берәй) фекерҙән яфаланыу; **страда́ть от любви́** мөхәббәт утынан ғазапланыу; **страда́ть за свои́ убежде́ния** үҙеңдең ҡараштарың өсөн яфа сигеү **2.** *за кого-что* (*сочувствовать*) ҡайғырыу, йөрәк өҙөлөү, күңел әрнеү (һыҙланыу) **3.** *чем*; *перен.* булыу, -мау/-мәү, -ыу/-еү; **страда́ть незна́нием пра́вил движе́ния** хәрәкәт ҡағиҙәләрен белмәү **4.** *от кого-чего* (*терпеть ущерб, урон*) зарар (зыян) күреү, зарар (зыян) килеү; **посе́вы страда́ют от сорняко́в** ҡый үләндәренән сәсеүлектәргә зыян килә **5.** *разг.* аҡһау, насар (түбән) булыу; **у ученика́ страда́ет гра́мотность** уҡыусының грамоталылығы аҡһай **6.** *по кому-чему* (*тосковать*) һағыныу, зарығыу

**СТРА́ДНЫЙ** и *уст.* **СТРАДНО́Й,** -ая, -ое **1.** ураҡ ...ы, бесән ...ы, ураҡ, бесән, ураҡ (бесән) өҫтө ...ы; **стра́дная пора́** ураҡ ваҡыты **2.** *уст.* ғазап (аҙап, ыҙа) сиккән **3.** *книжн.* (*исполненный страданий*) михнәтле

**СТРАЖ** *м*; *высок.* ҡоралл һаҡсы

**СТРА́ЖА** *ж* ҡоралл һаҡсылар ♦ **на стра́же (быть, стоя́ть)** һаҡта тороу; **встать на стра́жу** һаҡларға (һаҡҡа) баҫыу; **быть (содержа́ться) под стра́жей** һаҡ аҫтында (төрмәлә) булыу

**СТРА́ЖНИК** *м* стражник (*революцияға тиклем Рәсәйҙә ауылдағы иң түбән полицей чины*)

**СТРАНА́** *ж*; *в разн. знач.* ил; **развива́ющиеся стра́ны** үҫешеүсе илдәр; **го́рная страна́** тауҙар иле, таулы ил; **жа́ркие стра́ны** эҫе яҡ илдәре ♦ **стра́ны све́та** *геогр.* донъя тарафтары

**СТРАНИ́ЦА** *ж* **1.** бит; **страни́цы кни́ги** китап биттәре **2.** *в чём, чего, какая*; *перен.* сәхифә; **страни́цы исто́рии** тарих сәхифәләре ♦ **откры́ть но́вую страни́цу** яңы бит асыу (*яңы эш башлап ебәреү*)

**СТРА́ННИК** *м* и **СТРА́ННИЦА** *ж* **1.** илгиҙәр, мосафир **2.** *уст. см.* **пало́мник**

**СТРА́ННОСТЬ** *ж* **1.** ғәжәплек, сәйерлек, ғәжәп (сәйер) нәмә; **стра́нность взгля́дов** ҡараштар сәйерлеге **2.** *обычно мн.* **стра́нности** сәйер ҡыланыштар (ғәҙәттәр)

**СТРА́ННЫЙ,** -ая, -ое сәйер, ғәжәп; **стра́нный вид** сәйер ҡиәфәт ♦ **стра́нное де́ло** *в знач. вводн. сл.* ғәжәп (хәл), ҡыҙыҡ (аптырарлыҡ) эш

**СТРАНОВЕ́ДЕНИЕ** *с* илдәр өйрәнеү фәне (эше)

**СТРА́НСТВИЕ** *с* ил гиҙеү, сәйәхәт итеү, сәйәхәт

**СТРАНОВЕ́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое илдәр өйрәнеү ...ы

**СТРА́НСТВОВАТЬ** *несов.* ил гиҙеү, сәйәхәт итеү (ҡылыу), сәйәхәттә булыу

**СТРА́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ялҡынлы, ҡыҙыу, тәьҫирле; **стра́стная речь** ялҡынлы телмәр; **стра́стные спо́ры** ҡыҙыу бәхәстәр **2.** (*увлекающийся*) әүәҫ (һәүәҫ), күңел биреүсе (һалыусы), дәртле; **стра́стный рыболо́в** әүәҫ балыҡсы; **стра́стный люби́тель му́зыки** музыкаға күңел биреүсе кеше **3.** (*проявляющий страсть, пылкий*) дәртле, ялҡынлы; **стра́стный челове́к** дәртле кеше; **стра́стная любо́вь** ялҡынлы мөхәббәт

**СТРАСТЬ** *ж* **1.** дәрт, көслө (ялҡынлы) теләк; **обузда́ть свои́ стра́сти** дәртеңде тыйыу **2.** (*сильная увлечённость*) дәрт, юғары рух; **де́лать со стра́стью** дәрт менән эшләү **3.** *к чему* и *без доп.* һәүәҫ (әүәҫ) булыу, һәүәҫлек (әүәҫлек), бирелгәнлек; **страсть к му́зыке** музыкаға бирелгәнлек; **страсть к чте́нию** китап уҡырға әүәҫ булыу **4.** (*предмет сильного увлечения*) мауыҡтырған нәмә, бирелеп яратҡан нәмә **5.** дәртле мөхәббәт, ғишыҡ; **воспыла́ть стра́стью** дәртле мөхәббәт ҡабыныу

**СТРАТЕ́Г** *м* стратег; **страте́г револю́ции** революция стратегы

**СТРАТЕГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое стратегия ...ы, стратегик; **стратеги́ческое вооруже́ние** стратегик ҡорал

**СТРАТЕ́ГИЯ** *ж* стратегия (**1.** *һуғыш алып барыу оҫталығы* **2.** *күсм. ижтимағи, сәйәси көрәштә етәкселек итеү оҫталығы*)

**СТРАТОНА́ВТ** *м* стратонавт (*стратосфераға осоусы*)

**СТРАТОСТА́Т** *м* стратостат (*стратосфераға күтәрелеү аппараты*)

**СТРАТОСФЕ́РА** *ж* стратосфера (*атмосфераның өҫкө ҡатламы*)

**СТРАТОСФЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое стратосфера ...ы; **стратосфе́рные слои́** стратосфера ҡатламдары

**СТРА́УС** *м* дөйәғош, страус

**СТРА́УСОВЫЙ,** -ая, -ое страус ...ы, дөйәғош ...ы; **стра́усовое перо́** страус ҡауырһыны

**СТРАХ** *м* **1.** ҡурҡыу, ҡурҡыныс нәмә (ваҡиға), ҡот осоу; **страх сме́рти** үлем ҡурҡынысы; **дрожа́ть от стра́ха** ҡурҡыуҙан (ҡурҡып) ҡалтырау **2.** *обычно мн.* **стра́хи**; *разг.* ҡурҡыуҙар, ҡурҡыш; **ночны́е стра́хи** төнгө ҡурҡыуҙар ♦ **не за страх, а за со́весть** *см.* **со́весть**; **под стра́хом сме́рти** үлем ҡурҡынысы аҫтында; **у стра́ха глаза́ велики́** ҡурҡҡанға ҡуш күренә; **(де́йствовать) на свой страх и риск** ҡурҡмайынса, тәүәккәллек менән (эш итеү), ҡурҡмай (тәүәккәл) эш итеү

**СТРАХКА́ССА** *ж* страхкасса (*страховка кассаһы*)

**СТРАХКА́ССОВЫЙ,** -ая, -ое страхкасса ...ы; **страхка́ссовый бланк** стархкасса бланкыһы; **страхка́ссовый слу́жащий** страхкасса хеҙмәткәре

**СТРАХОВА́НИЕ** *с* **1.** страховкалау; **страхова́ние жи́зни** ғүмерҙе страховкалау **2.** *см.* **страхова́ть** 2, 3 ♦ **социа́льное страхова́ние** *см.* **социа́льный**

**СТРАХОВА́ТЕЛЬ** *м* страховкалаусы (*учреждение йәки шәхес*)

**СТРАХОВА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** страховкалау; **страхова́ть иму́щество** мөлкәт страховкалау **2.** *кого* һаҡлау, һаҡлау сараһын күреү, страховкалау; **страхова́ть спортсме́на** спортсыны страховкалау **3.** *кого*; *перен.* һаҡлау, һаҡланыу сараһын күреү; **страхова́ть себя́ от ри́ска** үҙеңде хәүеф-хәтәрҙән һаҡлау

**СТРАХОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** страховкаланыу; **страхова́ться от пожа́ра** янғындан страховкаланыу **2.** *перен.* (*ограждать себя от чего-л. неприятного, нежелательного*) һаҡланыу, һаҡланыу сараларын күреү, страховкаланыу; **альпини́сты страху́ются** альпинистар страховкалана **3.** *страд. от* **страхова́ть**

**СТРАХО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **страхова́ть 2.** *разг.* страховка аҡсаһы; **получи́ть страхо́вку** страховка аҡсаһын алыу

**СТРАХО́ВЩИК** *м* страховкалаусы (*учреждение йәки шәхес*)

**СТРАШЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *прост.* бик ныҡ, ҡот осҡос; **страше́нный моро́з** ҡот осҡос һыуыҡтар

**СТРАШИ́ЛИЩЕ** *м* и *с*; *разг.* ҡурҡыныс, ҡот осҡос, имәнес (*нәмә, кеше һ.б.*)

**СТРАШИ́ТЬ** *несов. кого-что* ҡурҡытыу, ҡурҡыу һалыу, ҡотто алыу (осороу)

**СТРАШИ́ТЬСЯ** *несов. кого-чего* ҡурҡыу, ҡот осоу, ҡот алыныу

**СТРА́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡурҡыныс, ҡот осҡос, имәнес; **стра́шный сон** ҡурҡыныс төш; **стра́шный слу́чай** ҡот осҡос ваҡиға **2.** *разг.* (*очень сильный или очень большой — о степени проявления, интенсивности чего-л.*) бик (үтә) көслө (ҡаты, ныҡ, ҙур), ҡот осҡос; **стра́шная боль** бик ныҡ ауыртыу; **стра́шный тума́н** бик көслө томан; **стра́шный хо́лод** бик ҡаты һалҡын, ҡот осҡос һалҡын

**СТРЕ́ЖЕНЬ** *м* көслө ағым (*йылғаның уртаһындағы*)

**СТРЕКА́Ч: дать (зада́ть) стрекача́** һыпыртыу, сабып сығып китеү

**СТРЕКОЗА́** *ж* энәғараҡ

**СТРЕКО́ЗИЙ,** -ья, -ье и **СТРЕКОЗИ́НЫЙ,** -ая, -ое энәғараҡ ...ы; **стрекози́ные кры́лья** энәғараҡ ҡанаттары

**СТРЕ́КОТ** *м* сыр-сыу итеү, сырылдау, сырылдаған тауыш; **стре́кот кузне́чиков** сиңерткәләр сырылдауы

**СТРЕКОТА́НИЕ** *с см.* **стрекота́ть**

**СТРЕКОТА́ТЬ** *несов.* **1.** сырылдау **2.** *перен.*, *разг.* ләпелдәү, туҡтауһыҙ һөйләү

**СТРЕКОТНЯ́** *ж*; *разг. см.* **стре́кот**

**СТРЕЛА́** *ж* **1.** уҡ; **пусти́ть стрелу́** уҡ атыу **2.** уҡ, көйәнтә; **стрела́ кра́на** кран көйәнтәһе **3.** *см.* **стре́лка** 2; **4.** *в знач. нареч.* **стрело́й** (*очень быстро*) уҡ кеүек (тиҙ), атылған уҡ кеүек; **лете́ть стрело́й** уҡ кеүек тиҙ осоу **5.** *в знач. нареч.* **стрело́й** (*очень прямо*) уҡ һымаҡ тура, туп-тура (булып), төп-төҙ **6.** *см.* **стре́лка** 6

**СТРЕЛЕ́Ц** *м* **1.** стрелец (*XVI—XVII бб. Рәсәйҙә айырым хоҡуҡтар менән файҙаланылған хәрби*) **2.** *астр.* Уҡсы (*йондоҙлоҡ*)

**СТРЕ́ЛКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **стрела́** 1; **2.** (*у растений*) һабаҡ, көпшә **3.** стрелка, тел, уҡ; **стре́лка часо́в** сәғәт теле; **стре́лка ко́мпаса** компас уғы **4.** *ж.-д.* стрелка **5.** (*мыс при слиянии двух рек*) морон **6.** (*знак*) уҡ (*билге*)

**СТРЕЛКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** уҡсы(лар) ...ы; **стрелко́вый полк** уҡсылар полкы **2.** атыу ...ы, атыу буйынса ...ы; **стрелко́вый спорт** атыу спорты

**СТРЕЛОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое уҡ һымаҡ, осло, ослайып торған

**СТРЕЛО́К** *м* уҡсы, атыусы

**СТРЕ́ЛОЧНИК** *м* и **СТРЕ́ЛОЧНИЦА** *ж* стрелочник (*тимер юлында стрелканы күсереүсе*)

**СТРЕ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое стрелка ...ы, стрелка күсереү ...ы; **стре́лочные устро́йства** стрелка күсереү ҡулайламаһы

**СТРЕЛЬБА́** *ж см.* **стреля́ть** 1

**СТРЕ́ЛЬБИЩЕ** *с* стрельбище, атыу (атырға өйрәнеү) урыны

**СТРЕЛЬНУ́ТЬ** *сов.* **1.** атыу, атып ебәреү **2.** *безл.* сәнсеп ебәреү (китеү); **стрельну́ло в у́хо** ҡолаҡ сәнсеп ебәрҙе

**СТРЕ́ЛЬЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** уҡ һымаҡ, ослайып торған, осло; **стре́льчатый свод** ослайып торған көмбәҙ **2.** көпшә, көпшәле, көпшәгә ултырған; **стре́льчатый лук** көпшәгә ултырған һуған

**СТРЕ́ЛЯНЫЙ,** -ая, -ое **1.** атып үлтерелгән (төшөрөлгән, алынған); **стре́ляная дичь** атып алынған кейек ҡош **2.** (*побывавший в боях*) ут аҫтында булған, һуғыш эсендә (һуғышта) булған; **стре́ляный солда́т** һуғышта булған һалдат **3.** атылған, атып файҙаланылған; **стре́ляная ги́льза** атылған гильза ♦ **стре́ляный воробе́й** ҡарт бүре (*күпте күргән, тәжрибәле кеше тураһында*)

**СТРЕЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** атыу; **стреля́ть из пистоле́та** пистолеттан атыу; **стреля́ть у́ток** өйрәк атыу **2.** *безл.*; *разг.* сәнсеү, сатнау; **в пра́вом у́хе стреля́ет** уң ҡолаҡ сәнсә ♦ **стреля́ть глаза́ми**: 1) күҙ атыу (*ян-яҡҡа ҡараныу*); 2) күҙ уйнатыу; **стреля́ть из пу́шки по воробья́м** ат менән сәпсек баҫтырыу

**СТРЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* (*стрелять с целью самоубийства*) атылыу, атылып үлеү, үҙен-үҙе атып үлтереү **2.** *с кем* и *без доп.*; *уст.* дуэлдә атышыу **3.** *страд. от* **стреля́ть** 1

**СТРЕМГЛА́В** *нареч.* бик тиҙ, атылып, күҙ асып йомғансы

**СТРЕМЕННО́Й** и **СТРЕМЯ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** өҙәңге ...ы; **стременно́й реме́нь** өҙәңге ҡайышы **2.** *в знач. сущ.* **стременно́й** и **стремя́нный** *м*; *уст.* ат ҡараусы, ялсы

**СТРЕ́МЕЧКО** *с* **1.** *уменьш. от* **стре́мя** 1; **2.** *анат.* өҙәңге һөйәге (*урта ҡолаҡта*)

**СТРЕМИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** урғылып -ған/-гән; **стреми́тельный пото́к** урғылып аҡҡан (ташҡын) һыу **2.** ашҡыныулы, (бик) ҡыҙыу, ашығыусан; **стреми́тельная жизнь** ҡыҙыу тормош

**СТРЕМИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** тиҙ хәрәкәт итеү **2.** *к чему* и *с неопр.* ынтылыу, атлығыу; **стреми́ться к зна́ниям** белемгә ынтылыу **3.** *перен.* (*о чувствах*) ашҡыныу; **стреми́ться се́рдцем** йөрәк менән ашҡыныу

**СТРЕМЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *книжн. см.* **стреми́ться** 1; **2.** ынтылыш, ынтылыу, ниәт; **стремле́ние к ми́ру** тыныслыҡҡа ынтылыу

**СТРЕМНИ́НА** *ж* **1.** (*в реке*) шаршы, шаран; **лови́ть ры́бу на стремни́не** шаршыла балыҡ тотоу; **попа́сть в стремни́ну** шаранға эләгеү **2.** *уст.* (*обрыв*) текә ҡая, ярлау; **стоя́ть у стремни́ны** текә ҡая ситендә тороу **3.** *уст.* (*пропасть*) упҡын

**СТРЕ́МЯ** *с* **1.** өҙәңге; **опира́ться на стре́мя** өҙәңгегә баҫыу **2.** *анат. см.* **стре́мечко** 2 ♦ **стре́мя в стре́мя (е́хать)** йәнәш барыу (*һыбай*)

**СТРЕМЯ́НКА** *ж* (*переносная*) таған баҫҡыс; (*подвесная*) бау баҫҡыс

**СТРЕНО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **стрено́жить 2.** *прил.* тышаулы; **стрено́женная ло́шадь** тышаулы ат

**СТРЕНО́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **стрено́жить**

**СТРЕНО́ЖИТЬ** *сов. кого* кеҙәләү, кешәнләү, кешәнләп тышау

**СТРЕ́ПЕТ** *м* биҙгәләк, ҡарһаҡ туғаҙаҡ (*дала ҡошо*)

**СТРЕПТОКО́КК** *м*; *мед.* (*бактерия*) стрептококк; **стрептоко́кк гноеро́дный** эренләткес стрептококк

**СТРЕСС** *м* стресс (*эске көсөргәнеш*)

**СТРЕ́ССОВЫЙ,** -ая, -ое стресс ...ы; **стре́ссовое состоя́ние** стресс хәле

**СТРЕХА́** *ж* (*край крыши*) ҡыйыҡ сите

**СТРИГУ́Н** и **СТРИГУНО́К** *м* ҡырҡмыш, ҡырҡмыш тай

**СТРИГУ́ЩИЙ,** -ая, -ее *прич. от* **стричь** ♦ **стригу́щий лиша́й** *мед.* ҡырҡылсан тимрәү

**СТРИЖ** *м* яр ҡарлуғасы, керәшә

**СТРИ́ЖЕНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сәсе (йөнө) ҡырҡылған (алынған), ҡыҫҡа сәсле **2.** ҡырҡылған; **стри́женая трава́** ҡырҡылған үлән

**СТРИ́ЖКА** *ж* **1.** *см.* **стричь**; **стри́жка воло́с** сәс алыу **2.** (сәс) ҡырҡыу (ысулы); **мо́дная стри́жка** модалы итеп сәс ҡырҡыу

**СТРИХНИ́Н** *м* стрихнин (*көслө ағыу төрө*)

**СТРИЧЬ** *несов.* ҡырҡыу, алыу; **стричь во́лосы** сәс алыу; **стричь но́гти** тырнаҡ ҡырҡыу ♦ **стричь (всех) под одну́ гребёнку** бер ҡалыпҡа һуғыу

**СТРИ́ЧЬСЯ** *несов.* **1.** алдырыу, киҫтереү; **ко́ротко стри́чься** сәсте ҡыҫҡа итеп алдырыу **2.** *страд. от* **стричь**

**СТРОГА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йышыу ...ы; **строга́льный стано́к** йышыу станогы

**СТРОГА́ТЬ** *несов. что* йышыу, йышҡылау; **строга́ть руба́нком** йышҡы менән йышыу

**СТРО́ГИЙ,** -ая, -ое **1.** (*требовательный*) талапсан, талап итеүсән; **стро́гий учи́тель** талапсан уҡытыусы **2.** ҡаты, ҡәтғи; **стро́гий вы́говор** ҡаты шелтә **3.** теүәл, ныҡ, ныҡлы; **стро́гий учёт** ныҡлы иҫәп **4.** әҙәп ҡағиҙәләрен тотҡан (һаҡлаған); **челове́к стро́гих пра́вил** әҙәп ҡағиҙәләрен тотҡан кеше **5.** күҙгә ташланып (айырылып) тормаған, ябай, килешле; **стро́гое пальто́** ябай пальто **6.** ҡоро, ҡырыҫ, ҡәтғи; **стро́гий го́лос** ҡәтғи тауыш

**СТРО́ГОСТЬ** *ж* **1.** талапсанлыҡ; **стро́гость учи́теля** уҡытыусының талапсанлығы **2.** ҡырыҫлыҡ, ҡәтғилек; **стро́гость го́лоса** тауыштың ҡырыҫлығы **3.** теүәллек, ҡатылыҡ; **стро́гость учёта** хисаптың теүәллеге **4.** *мн.* **стро́гости**; *разг.* ҡаты тәртип ♦ **по всей стро́гости зако́на** закон талаптарына ярашлы рәүештә

**СТРОЕВО́Й I,** -ая, -ое *воен.* строевой; **строевы́е ча́сти** строевой частар; **строева́я слу́жба** строевой хеҙмәт

**СТРОЕВО́Й II,** -ая, -ое **1.** (*о деревьях*) төҙөлөшкә яраҡлы, төҙ һәм тигеҙ; **строево́й лес** төҙөлөшкә яраҡлы ағас **2.** (*о строительных материалах*) төҙөлөш ...ы

**СТРОЕ́НИЕ** *с* **1.** (*постройка*) йорт, ҡаралты; **кирпи́чное строе́ние** кирбес ҡаралты **2.** (*структура*) ҡоролош, төҙөлөш; **строе́ние а́тома** *физ.* атом төҙөлөшө; **строе́ние ко́рня** *бот.* тамыр төҙөлөшө

**СТРОИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** төҙөүсе; **рабо́тать строи́телем** төҙөүсе булып эшләү **2.** *чего*; *перен.*, *высок.* төҙөүсе, ҡороусы; **строи́тели но́вой жи́зни** яңы тормош төҙөүселәр

**СТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое төҙөү ...ы, төҙөлөш ...ы; **строи́тельный материа́л** төҙөлөш материалы; **строи́тельный лес** төҙөлөш ағасы

**СТРОИ́ТЕЛЬСТВО** *с* **1.** төҙөү, һалыу эше, ҡороу, төҙөлөш; **строи́тельство жилы́х домо́в** торлаҡ йорттар төҙөү **2.** (*строящееся здание, сооружение*) төҙөлөш, ҡоролма; **огнесто́йкое строи́тельство** янғынға сыҙамлы төҙөлөш **3.** *чего*, *какое*; *перен.* төҙөү, төҙөлөш; **культу́рное строи́тельство** мәҙәниәт төҙөлөшө

**СТРО́ИТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* төҙөү, һалыу, ҡороу; **стро́ить заво́д** завод ҡороу; **стро́ить дом** өй һалыу **2.** *что* и *без доп.* (*изготовлять*) төҙөү, яһау, эшләү; **стро́ить самолёты** самолёттар эшләү **3.** *что*; *перен.* төҙөү, ҡороу; **стро́ить пла́ны** пландар ҡороу **4.** *что*; *мат.* һыҙыу, яһау; **стро́ить треуго́льник** өсмөйөш һыҙыу **5.** *что* (*составлять*) төҙөү, ойоштороу; **пра́вильно стро́ить предложе́ние** һөйләмде дөрөҫ төҙөү **6.** *что* (*ос-*

*новывать на чём-л.*) яһау; **стро́ить вы́воды** һығымта яһау **7.** *кого-что* (сафҡа) теҙеү; **стро́ить ро́ту** ротаны теҙеү ♦ **стро́ить (де́лать) гла́зки** *см.* **глазо́к**; **стро́ить из себя́** *кого* үҙеңде әллә кемгә ҡуйыу; **стро́ить (постро́ить) на песке́** йомшаҡ нигеҙгә ҡороу (*уй-ниәтте һ.б.*); **стро́ить ко́зни** *кому* хөсөтлөк эшләү

**СТРО́ИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*строить для себя*) үҙеңә йорт (ҡаралты) һалыу **2.** төҙөлөү, ҡоролоу, һалыныу; **на ве́рфи стро́ится кора́бль** верфтә карап төҙөлә **3.** *перен.* барлыҡҡа килеү, булдырылыу; **стро́ится но́вая жизнь** яңы тормош барлыҡҡа килә **4.** ҡоролоу, төҙөлөү; **стро́ятся пла́ны** пландар ҡорола **5.** (сафҡа) теҙелеү **6.** *страд. от* **стро́ить**

**СТРОЙ** *м* **1.** *какой* төҙөлөш, ҡоролош; **обще́ственный строй** йәмғиәт ҡоролошо; **феода́льный строй** феодаль ҡоролош **2.** саф, строй; **стоя́ть в строю́** сафта тороу; **вы́йти из стро́я** сафтан сығыу **3.** (*система построения чего-л.*) төҙөлөш; **строй языка́** тел төҙөлөшө **4.** *муз.* көйләнеш, көй ♦ **вступи́ть в строй** эшләй башлау; **выходи́ть из стро́я** рәттән сығыу, эшлектән сығыу; **вы́вести из стро́я** эштән сығарыу

**СТРОЙ...** и **...СТРОЙ** *ҡушма һүҙҙәрҙең "төҙөү", "төҙөлөш" мәғәнәһен белдергән өлөшө, мәҫ.*, **стройматериа́лы** төҙөлөш материалдары

**СТРО́ЙКА** *ж* **1.** (*строительство*) төҙөлөш; **рабо́тать на стро́йке** төҙөлөштә эшләү **2.** (*строящееся здание, сооружение*) төҙөлөш, ҡоролма; **но́вая стро́йка** яңы ҡоролма

**СТРО́ЙНОСТЬ** *ж* **1.** (*пропорционально и красиво сложенный*) зифалыҡ, һомғоллоҡ, зифа буйлылыҡ; **стро́йность фигу́ры** буй-һындың зифалығы **2.** *перен.* (*правильность расположения*) төҙөклөк, тәртиплелек **3.** (*логичность*) йыйнаҡлыҡ, аныҡлыҡ, төҙөклөк; **композицио́нная стро́йность произведе́ния** әҫәрҙең композицион йыйнаҡлығы; **стро́йность мы́слей** фекер аныҡлығы **4.** (*гармоничность*) аһәңле яңғыраш, аһәңлелек

**СТРО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** зифа, һомғол, матур кәүҙәле, зифа буйлы; **де́вушка со стро́йной фигу́рой** зифа буйлы ҡыҙ; **стро́йная сосна́** һомғол ҡарағай **2.** тигеҙ, төҙөк, төҙ; **стро́йные ряды́** тигеҙ сафтар **3.** дөрөҫ ойошторолған (төҙөлгән); **стро́йная речь** дөрөҫ төҙөлгән телмәр **4.** (*гармоничный*) ҡолаҡҡа ятышлы, аһәңле; **стро́йное пе́ние** ҡолаҡҡа ятышлы йыр **5.** (*логичный*) йыйнаҡ, аныҡ, төҙөк

**СТРОЙОТРЯ́Д** *м* төҙөлөш отряды; **студе́нческий стройотря́д** студенттарҙың төҙөлөш отряды

**СТРОЙПЛОЩА́ДКА** *ж* төҙөлөш майҙансығы

**СТРОКА́** *ж* юл; **прозаи́ческие стро́ки** сәсмә юлдар; **стихотво́рные стро́ки** шиғри юлдар ♦ **кра́сная строка́** *см.* **кра́сный**; **строка́ в строку́** һүҙмә-һүҙ; **чита́ть ме́жду строк** яҙыуҙа әйтеп бөтөрмәгән уйҙарҙы тотоп алыу, кинәйәне аңлау

**СТРО́НУТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* урынынан ҡуҙғатыу, ҡуҙғатып ебәреү

**СТРО́НУТЬСЯ** *сов.*, *разг.* (урындан) ҡуҙғалыу, ҡуҙғалып китеү

**СТРОП** *м*; *спец.* строп (*арҡан, канат йәки трос*)

**СТРОПИ́ЛО** *с обычно мн.* **стропи́ла** асамай, атлама (*ҡаралты ҡыйығында*); **ста́вить стропи́ла** асамай ҡуйыу

**СТРОПИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое асамайлыҡ, атламалыҡ; **стропи́льный материа́л** асамайлыҡ материал

**СТРОПТИ́ВЫЙ,** -ая, -ое арҡыры, кире, кеҙе, үҙ һүҙле; **стропти́вый челове́к** кеҙе кеше

**СТРОФА́** *ж* **1.** *лит.* строфа (*шиғырҙың билдәле бер үлсәм, ритм, интонацион-синтаксик төҙөлөшө менән, ә рифмалы шиғырҙарҙа урынлашыу тәртибе яғынан бәйләнгән өлөшө*) **2.** *обычно мн.* **стро́фы** шиғыр

**СТРО́ФИКА** *ж*; *лит.* строфика (**1.** *шиғырҙың строфаларға бүленеше* **2.** *шиғыр төҙөлөшө тураһындағы фәндең строфаларға бағышланған бүлеге*)

**СТРОЧЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*прошитый строчкой*) ҡайылған, буйлап тегелгән **2.** (*вышитый строчкой*) буйлап сигелгән

**СТРОЧИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* йөйләү, йөйләп (йүрмәп) тегеү, ҡайыу; **строчи́ть карма́ны** кеҫәләрҙе ҡайыу **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* тегеү; **строчи́ть на шве́йной маши́нке** тегеү машинаһында тегеү **3.** *что* и *без доп.*; *перен.*, *разг.* (*о письме*) тиҙ-тиҙ яҙыу, (тиҙ генә) яҙып ташлау; (*о речи*) теле-телгә йоҡмау; **строчи́ть письмо́** хат яҙып ташлау **4.** *разг.* (*стрелять*) ут һиптереү (яуҙырыу), атыу; **строчи́ть из пулемёта** пулемёттан ут яуҙырыу

**СТРО́ЧКА I** *ж* **1.** *см.* **строчи́ть** 1; **2.** (*шов*) йөй; **ме́лкая стро́чка** ваҡ йөй **3.** *перен.*, *разг.* (*короткая очередь из пулемёта, автомата*) ут һиптереү (яуҙырыу), атыу

**СТРО́ЧКА II** *ж см.* **строка́** ♦ **стро́чка в стро́чку** *см.* **строка́ в строку́**

**СТРОЧНО́Й** и **СТРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое бәләкәй, юл; **стро́чная бу́ква** бәләкәй хәреф, юл хәрефе (*яҙыуҙа, баҫмала*)

**СТРОЧО́К** *м* тубырсыҡбаш бәшмәк

**СТРУГ I** *м* (*ручной инструмент*) йышҡы

**СТРУГ II** *м* (*старинное русское речное судно*) аталғы (*ишкәкле һәм елкәнле ағас карап*)

**СТРУГА́ТЬ** *несов. см.* **строга́ть**

**СТРУ́ЖКА** *ж* тап, юнысҡы; **стру́жка де́рева** ағас юнысҡыһы; **стру́жка желе́за** тимер юнысҡыһы

**СТРУИ́СТЫЙ,** -ая, -ое һыҙылып (һуҙылып) аҡҡан

**СТРУИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*о жидкости*) туҡтауһыҙ (өҙлөкһөҙ) ағып тороу, шыбырлап ағыу; **по лицу́ струи́тся пот** биттән шыбырлап тир аға

2. *перен.* (*распространяться струёй*) бөркөләү, һибелеү, таралыу; **струи́тся арома́т цвето́в** сәскәләрҙең хуш еҫе тарала

**СТРУКТУ́РА** *ж* төҙөлөш, структура; **структу́ра по́чвы** тупраҡ структураһы; **структу́ра посевны́х площаде́й** сәсеү майҙандарының структураһы

**СТРУКТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое структуралы, төҙөлөш ...ы, структур, структура ...ы; **структу́рные по́чвы** *с.-х.* структуралы тупраҡ; **структу́рные фо́рмулы** төҙөлөш формулалары

**СТРУНА́** *ж* ҡыл; **стру́ны гита́ры** гитара ҡылдары ♦ **сла́бая струна́** *см.* **сла́бый**

**СТРУ́НКА** *ж*; *уменьш. от* **струна́** ♦ **по стру́нке ходи́ть** *перед кем кемдер алдында* бейеп кенә йөрөү

**СТРУ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыллы; **стру́нные инструме́нты** ҡыллы ҡоралдар **2.** ҡыллы, ҡыллы музыка ҡоралдары ...ы; **стру́нный орке́стр** ҡыллы музыка ҡоралдары оркестры

**СТРУП** *м* ҡутыр (*яралы урындағы*)

**СТРУ́СИТЬ** *сов.* ҡурҡып (шөрләп) ҡалыу, шөрләү

**СТРУХНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* бик ныҡ ҡурҡыу

**СТРУЧКО́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡуҙаҡлы; **стручко́вый пе́рец** ҡуҙаҡлы борос

**СТРУЧО́К** *м* ҡуҙаҡ; **стручо́к горо́ха** борсаҡ ҡуҙағы

**СТРУЯ́** *ж* **1.** (*воды*) аҡма (аҡҡан) һыу, ағым; (*воздуха*) һауа ағымы; (*света*) ут яҡтылығы, яҡтылыҡ, нур **2.** *перен.* (*направление*) йүнәлеш ♦ **влить (внести́) живу́ю (све́жую) струю́** яңы йүнәлеш биреү

**СТРЯ́ПАТЬ** *несов. что*; *разг.* **1.** аш бешереү, аш-һыу әҙерләү; **стря́пать обе́д** төшкө аш әҙерләү **2.** *перен.*, *пренебр.* этмәләү, маташтырыу, -ып/-еп маташыу; **стря́пать стишо́к** шиғыр этмәләү

**СТРЯПНЯ́** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **стря́пать 2.** (*то, что состряпано*) бешерелгән ашамлыҡ, аш, аш-һыу; **невку́сная стряпня́** тәмһеҙ аш **3.** *перен.* (*о грубом, неискусном сочинении, пьесе и т.п.*) насар яҙылған (этмәләнгән) әҫәр

**СТРЯПУ́ХА** *ж*; *разг.* аш бешереүсе, аш әҙерләүсе, ашнаҡсы

**СТРЯ́ПЧИЙ** *м* стряпчий (**1.** *тар. Рәсәй дәүләтендә батша һарайында хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнеүсе хеҙмәтсе* **2.** *XIX б. Рәсәйҙә суд эштәрен алып барыу тәртибен күҙәтеүсе чиновник*)

**СТРЯСА́ТЬ** *несов. см.* **стрясти́**

**СТРЯСА́ТЬСЯ I** *несов. см.* **стрясти́сь**

**СТРЯСАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **стряса́ть**

**СТРЯСТИ́** *сов. что* һелкетеп (ҡағып) төшөрөү; **стрясти́ я́блоки с де́рева** алмағастың алмаларын һелкетеп төшөрөү

**СТРЯСТИ́СЬ** *сов.*; *разг.* булыу, килеп сығыу; **что с тобо́й стрясло́сь?** һиңә ни булды?

**СТРЯ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **стряхну́ть**

**СТРЯХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һелкеп (ҡағып) төшөрөү, ҡағыу, һелкеү **2.** *что*; *перен.* ҡотолоу; **стряхну́ть тяжёлые мы́сли** ауыр уйҙарҙан ҡотолоу

**СТУДЕНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ҡойҡа һымаҡ; **студени́стое вещество́** ҡойҡа һымаҡ матдә

**СТУДЕ́НТ** *м* и **СТУДЕ́НТКА** *ж* студент; **студе́нт университе́та** университет студенты

**СТУДЕ́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** студент(тар) ...ы; **студе́нческое общежи́тие** студенттар ятағы **2.** студент ...ы, студентлыҡ ...ы; **студе́нческие го́ды** студент йылдары

**СТУДЕ́НЧЕСТВО** *с* **1.** *собир.* студенттар; **башки́рское студе́нчество** башҡорт студенттары **2.** студентлыҡ; **го́ды студе́нчества** студентлыҡ йылдары

**СТУДЁНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ыҙғыр, ыҙғырлы, бик һалҡын (һыуыҡ)

**СТУ́ДЕНЬ** *м* ҡойҡа, дерелдәк

**СТУДИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое студия ...ы, студиянан тапшырыла торған; **студи́йные рабо́ты** студия эштәре

**СТУДИ́ТЬ** *несов. что*; *разг.* **1.** (*охлаждать*) һыуытыу, һыуындырыу; **студи́ть чай** сәйҙе һыуытыу **2.** (*холодить*) өшөтөү

**СТУДИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** һыуыныу **2.** *прост.* (*мёрзнуть*) өшөү, һалҡын тейҙереү **3.** *страд. от* **студи́ть**

**СТУ́ДИЯ** *ж*; *в разн. знач.* студия; **музыка́льная сту́дия** музыкаль студия; **сту́дия худо́жника** рәссамдың студияһы

**СТУ́ЖА** *ж*; *разг.* сатлама (ҡаты) һыуыҡ

**СТУК I** *м* шаҡылдау, шаҡыу, туҡылдаған (шаҡылдаған) тауыш, таҡылдау; **стук копы́т** тояҡ таҡылдауы

**СТУК II** *межд.* **1.** туҡ; **стук-стук** туҡ-туҡ **2.** *в знач. сказ.*; *разг.* шап итеп һуҡты; **она стук кулако́м** ул йоҙроҡ менән шап итеп һуҡты

**СТУ́КАТЬ** *несов. см.* **сту́кнуть** 1, 2

**СТУ́КАТЬСЯ** *несов. см.* **сту́кнуться**

**СТУ́КНУТЬ** *сов. кого, чем* и *без доп.* **1.** (*ударить*) һуғыу, һуғып ебәреү, дөп итеп һуғыу; **сту́кнуть кулако́м по́ столу** йоҙроҡ менән өҫтәлгә һуғыу; **сту́кнуть по маку́шке** түбәһенә һуғыу **2.** (*постучать*) туҡылдатыу, шаҡылдатыу; **сту́кнуть в окно́** тәҙрә туҡылдатыу **3.** *кому безл.*; *разг.* (*наступить, исполниться*) тулыу; **ей сту́кнуло со́рок лет** уға ҡырҡ йәш тулды ♦ **сту́кнуло в го́лову** *кому*; *прост.* (ҡапыл) башына килде

**СТУ́КНУТЬСЯ** *сов.* бәрелеү, һуғылыу, төкөү, төкөтөү; **си́льно сту́кнуться** ныҡ бәрелеү; **сту́кнуться ного́й о ка́мень** аяҡ менән ташҡа бәрелеү

**СТУКОТНЯ́** *ж*; *разг.* шаҡылдаған тауыш, шаҡ-шоҡ итеү

**СТУЛ** *м* **1.** ултырғыс; **стул со спи́нкой** артлы ултырғыс; **сесть на стул** ултырғысҡа ултырыу **2.** *мед.* оло ярау, тиҙәк ♦ **сиде́ть ме́жду двух сту́льев** ике яҡҡа ла ярарға тырышыу

**СТУЛЬЧА́К** *м* бәҙрәф ултырғысы

**СТУ́ЛЬЧИК** *м* бәләкәй ултырғыс

**СТУ́ПА** *ж* киле; **деревя́нная сту́па** ағас киле ♦ **толо́чь во́ду в сту́пе** *см.* **вода́**

**СТУПА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **ступи́ть 2.** китеү, барыу **3.** *повел.* **ступа́й(те)** кит(егеҙ), бар(ығыҙ); **ступа́й к отцу́** атайың янына бар

**СТУПЕ́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** баҫҡыслы, киртләс-киртләс, киртләсле; **ступе́нчатые ска́лы** киртләс-киртләс ҡаялар **2.** *перен.* фазалы; **ступе́нчатое созрева́ние хле́бов** игендең фазалы өлгөрөүе

**СТУПЕ́НЬ** *ж* **1.** (*часть лестницы*) баҫҡыс, баҫма **2.** *чего* (*выступ, уступ*) киртләс, баҫҡыс **3.** *перен.* (*этап в развитии*) баҫҡыс **4.** (*разряд*) дәрәжә, баҫҡыс; **шко́ла второ́й ступе́ни** икенсе баҫҡыс мәктәп

**СТУПЕ́НЬКА** *ж*; *уменьш. от* **ступе́нь** 1—3

**СТУПИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*шагнуть*) атлау, аяҡ атлау (баҫыу); **не́куда ступи́ть** аяҡ баҫыр урын юҡ **2.** *на что*; *разг.* (*шагая, стать*) баҫыу; **гру́зно ступи́ть** ауыр баҫыу **3.** (*войти куда-л.*) атлап (барып) инеү, аяҡ атлау; **ступи́ть на терра́су** террасаға барып инеү **4.** (*очутиться где-л.*) аяҡ баҫыу ♦ **ша́гу нельзя́ ступи́ть** *см.* **шаг**

**СТУПИ́ЦА** *ж* тәгәрмәс көпсәге, көпсәк

**СТУ́ПКА** *ж*; *уменьш. от* **сту́па**

**СТУПНЯ́** *ж* **1.** (*стопа*) аяҡ башы **2.** (*подошва*) табан, аяҡ табаны

**СТУ́ПОР** *м*; *мед.* ступор (*хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡалыу күренеше*)

**СТУЧА́ТЬ** *несов.* **1.** (*производить шум при ударах, толчках и т.п.*) шаҡылдау, шаҡылдатыу, таҡылдау, туҡылдау; (*посудой*) шалтыратыу; (*клювом — о дятле*) суҡыу; **колёса стуча́т** тәгәрмәстәр шаҡылдай; **копы́та стуча́т** ат тояҡтары таҡылдай; **пулемёт стучи́т** пулемёт тыҡылдай; **стуча́ть молотко́м** сүкеш менән туҡылдау **2.** (*сильно биться*) ҡағыу, тыҡ-тыҡ итеү, дөпөлдәү; **се́рдце стучи́т** йөрәк ҡаға **3.** шаҡылдау, туҡылдау, шаҡылдатыу, шаҡыу, ҡағыу; (*сильно*) дөбөрләтеү; **стуча́ть в дверь** ишек шаҡылдатыу; **стуча́ть в окно́** тәҙрә шаҡыу

**СТУЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* (*удаляться*) бәрелеү, шап-шоп итеп бәрелеү **2.** *см.* **стуча́ть** 3; **стуча́ться в дверь** ишек шаҡылдатыу ♦ **стуча́ться в дверь** ишекте ҡағыу

**СТУШЕВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*смутиться*) оялып китеү, ҡаушап ҡалыу, ҡурҡып ҡалыу

**СТУШЁВЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **стушева́ться**

**СТЫД** *м* **1.** оят, хая, ғәрлек; **потеря́ть стыд** оятты юғалтыу, оятһыҙланыу; **чу́вство стыда́** оялыу тойғоһо **2.** *разг.* (*позор*) хурлыҡ; **натерпе́ться стыда́** хурлыҡтан ғазап сигеү ♦ **ни стыда́ ни со́вести** ояты ла, намыҫы ла юҡ; **к стыду́ своему́** *в знач. вводн. сл.* оятҡа ҡаршы

**СТЫДИ́ТЬ** *несов. кого* **1.** (*укорять*) оялтыу, ғәрләндереү **2.** *разг.* (*позорить*) хур итеү, хурлыҡҡа төшөрөү, хурлау

**СТЫДИ́ТЬСЯ** *несов. кого-чего, с неопр.* и *без доп.* оялыу, намыҫ итеү, хурланыу; **стыди́ться люде́й** кешеләрҙән оялыу

**СТЫДЛИ́ВОСТЬ** *ж* оялсанлыҡ, оялыусанлыҡ

**СТЫДЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое оялсан, оялыусан; **стыдли́вый челове́к** оялыусан кеше

**СТЫ́ДНО** *кому в знач. сказ., безл.* оят; **мне сты́дно за вас** һеҙҙең өсөн миңә оят

**СТЫК** *м* төкәмә, ялғау (*берәй нәмәнең тоташҡан урыны*)

**СТЫКО́ВКА** *ж*; *спец.* тоташыу, тоташтырыу

**СТЫКОВО́Й,** -ая, -ое *спец.* тоташҡан (тоташтырылған, беркетелгән) урындағы; **стыково́й шов** тоташтырылған урындағы йөй

**СТЫ́НУТЬ** *несов. см.* **стыть**

**СТЫТЬ** и **СТЫ́НУТЬ** *несов.* **1.** һыуыныу; **суп сты́нет** һурпа һыуына **2.** (*замерзать*) туңыу ♦ **кровь сты́нет в жи́лах** *см.* **кровь**

**СТЫ́ЧКА** *ж* бәрелеш, бәрелешеү, һуғыш; **сты́чка отря́дов** отрядтарҙың бәрелеше

**СТЮ́АРД** и **СТЮА́РД** *м* стюард (*диңгеҙ судноһында йәки самолётта пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереүсе официант*)

**СТЮАРДЕ́ССА** *ж* стюардесса (*һауа йәки диңгеҙ флотында пассажирҙарға хеҙмәт күрһәтеүсе*)

**СТЯГ** *м*; *высок.* әләм, тыу, байраҡ

**СТЯ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **стяну́ть** 1—4, 6—8

**СТЯ́ГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **стяну́ться 2.** *страд. от* **стя́гивать**

**СТЯЖА́ТЕЛЬ** *м* и **СТЯЖА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* байлыҡ туплаусы, мал йыйыусы (*шул шөғөлгә мөкиббән кеше*)

**СТЯЖА́ТЬ** *сов., несов. что* **1.** *книжн.* байлыҡ туплау, мал йыйыу **2.** *высок.* ҡаҙаныу, танылыу, ирешеү, эйә булыу; **стяжа́ть сла́ву** дан ҡаҙаныу; **стяжа́ть изве́стность** исеме танылыу

**СТЯНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*затянуть*) тартып бәйләү, тарттырып бәйләп ҡуйыу **2.** (*туго перевязать*) ҡыҫып бәйләү, ныҡ итеп тарттырып ҡуйыу **3.** (*собрать*) бер ергә йыйыу, туплау, тарттырыу; **стяну́ть войска́** ғәскәрҙе бер ергә туплау **4.** (*стащить*) тартып төшөрөү, тартыу; **стяну́ть одея́ло** юрғанды тартып төшөрөү **5.** *разг.* (*украсть*) сәлдереү, сиртеү **6.** *что* (*снять с трудом*) тартып-һуҙып сисеү **7.** (*сморщить*) йыйырыу, йыйырып тегеү; **стяну́ть шов при стро́чке** теккәндә йөйөн йыйырыу **8.** *тех.* (*скрепить*) тарттырып нығытып ҡуйыу

**СТЯНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*затянуться*) ныҡ тартылыу, ҡыҫып бәйләнеү **2.** *разг.* (*стянуть себя чем-л.*) билде ҡыҫып быуыу, ҡыҫып бәйләп ҡуйыу **3.** (*собраться*) бер ергә йыйылыу, тупланыу; **войска́ стяну́лись к ле́су** ғәскәр урманға тупланды **4.** тартылыу, йыйырылыу; **шов стяну́лся** йөй йыйырылды

**СУБАНТАРКТИ́ЧЕСКИЙ: субантаркти́ческий по́яс** Антарктика эргәһе поясы

**СУБАРЕ́НДА** *ж* субаренда (*ҡуртымға алған мөлкәтте ҡуртымға биреү*)

**СУБАРКТИ́ЧЕСКИЙ: субаркти́ческий по́яс** Арктика эргәһе поясы

**СУББО́ТА** *ж* шәмбе; **за́втра суббо́та** иртәгә шәмбе

**СУББО́ТНИЙ,** -яя, -ее шәмбе, шәмбе ...ы; **суббо́тний о́тдых** шәмбе ялы

**СУББО́ТНИК** *м* шәмбе өмәһе, өмә; **приня́ть уча́стие в суббо́тнике** өмәлә ҡатнашыу

**СУБОРДИНА́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* субординация (*кесе хеҙмәткәрҙәрҙең үҙенән юғары хеҙмәткәрҙәргә буйһоноуы*)

**СУБПОДРЯ́Д** *м*; *спец.* субподряд (*подряд килешеүе буйынса башҡарырға алған эште ҡайтанан подрядҡа тапшырып эшләү*)

**СУБПОДРЯ́ДЧИК** *м* субподрядсы

**СУБСИДИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* субсидия биреү, аҡсалата ярҙам итеү

**СУБСИ́ДИЯ** *ж* субсидия (*аҡсалата ярҙам*)

**СУБСТАНТИВА́ЦИЯ** *ж*; *лингв.* исемләшеү

**СУБСТАНТИВИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* исемләшкән; **субстантиви́рованные прилага́тельные** исемләшкән сифаттар

**СУБСТА́НЦИЯ** *ж* субстанция (**1.** *фәлс. метафизик фәлсәфәлә әйберҙең үҙгәрмәҫ асылы* **2.** *кит. берәй нәмәнең асылы, нигеҙе*)

**СУБСТРА́Т** *м* **1.** *филос.* субстрат **2.** *спец.* субстрат, ерлек

**СУБТРО́ПИКИ** *только мн.*; *геогр.* субтропиктар, тропик аралары (*тропиктарҙан төньяҡта һәм көньяҡта урынлашҡан өлкәләр*)

**СУБТРОПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *геогр.* субтропик, тропик араларындағы; **субтропи́ческий кли́мат** субтропик климат

**СУБЪЕ́КТ** *м* **1.** *филос., юр.* субъект, шәхес; **субъе́кт и объе́кт** субъект һәм объект; **субъе́кт пра́ва** хоҡуҡ субъекты; **субъе́кт преступле́ния** енәйәт субъекты **2.** *лог.* субъект (*һүҙ барған предмет, эш-хәрәкәттең эйәһе*) **3.** *грам.* эйә (*һөйләмдә*) **4.** *разг.* зат, әҙәм, кеше; **подозри́тельный субъе́кт** шикле кеше

**СУБЪЕКТИВИ́ЗМ** *м* **1.** *филос.* субъективизм (*объектив ысынбарлыҡты һанға һуҡмай, тәбиғәт һәм йәмғиәттең объектив закондарын инҡар иткән фәлсәфәүи йүнәлеш*) **2.** (*отсутствие объективности*) субъективлыҡ, субъектив ҡараш

**СУБЪЕКТИВИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое *филос.* субъективистик; **субъективи́стское толкова́ние** субъективистик аңлатыу

**СУБЪЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*личный, индивидуальный*) субъектив, шәхси; **субъекти́вные взгля́ды** субъектив ҡараштар **2.** (*предвзятый*) субъектив, бер яҡлы; **субъекти́вное мне́ние** субъектив фекер

**СУВЕНИ́Р** *м* йәдкәр, сувенир (*иҫтәлекле бүләк*)

**СУВЕРЕНИТЕ́Т** *м*; *полит.* суверенитет, суверенлыҡ, үҙаллылыҡ (**1.** *өҫтөн хоҡуҡлылыҡ* **2.** *эске һәм тышҡы сәйәсәттә дәүләттең бойондороҡһоҙ булыуы*)

**СУВЕРЕ́ННОСТЬ** *м*; *полит.* үҙаллылыҡ, мөстәҡиллек, суверенлыҡ

**СУВЕРЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое үҙ аллы, мөстәҡил, суверен, суверенлы; **сувере́нные госуда́рства** үҙ аллы дәүләттәр

**СУВО́РОВЕЦ** *м* суворовсы

**СУВО́РОВСКИЙ: Суво́ровское учи́лище** Суворовсылар училищеһы

**СУГЛИ́НИСТЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыл балсыҡлы, балсыҡһыл; **сугли́нистая по́чва** ҡыҙыл балсыҡлы тупраҡ

**СУГЛИ́НОК** *м* (ҡыҙыл) балсыҡлы тупраҡ

**СУГРО́Б** *м* көрт, һырынды; **провали́ться в сугро́б** көртҡә батыу

**СУГУ́БЫЙ,** -ая, -ое айырата ҙур (көслө); **сугу́бое внима́ние** айырата ҙур иғтибар

**СУД** *м* **1.** суд, хөкөм; **наро́дный суд** халыҡ суды; **отда́ть под суд** хөкөмгә биреү; **суд прися́жных** присяжныйҙар суды (*присяжный заседателдәр ҡатнашлығындағы суд*) **2.** (*общественный орган*) суд; **това́рищеский суд** иптәштәр суды **3.** *собир.* судьялар, суд; **совеща́ние суда́** суд кәңәшмәһе **4.** (*суждение, мнение*) фекер, хөкөм; **отда́ть на суд** хөкөмгә биреү (тапшырыу) ♦ **суд че́сти** намыҫ хөкөмө; **на нет и суда́ нет** юҡтың башы ауыртмай; **пока́ суд да де́ло** улай-былай иткәнсе

**СУДА́К** *м* һыла, һыла балығы

**СУ́ДАРЬ** *м*; *уст.* әфәндем (*ир-атҡа мөрәжәғәт формаһы*); **суда́рыня** *ж*; *уст.* ханым (*ҡатын-ҡыҙға мөрәжәғәт формаһы*)

**СУДА́ЧИТЬ** *несов.*; *разг.* ләстит һатыу, ғәйбәт һөйләү

**СУДЕ́БНИК** *м*; *ист.* закондар йыйылмаһы, закондар китабы

**СУДЕ́БНО-МЕДИЦИ́НСКИЙ,** -ая, -ое суд-медицина ...ы; **суде́бно-медици́нская эксперти́за** суд-медицина экспертизаһы

**СУДЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое суд ...ы, хөкөм ...ы; **суде́бная пра́ктика** хөкөм практикаһы; **суде́бный проце́сс** суд барышы; **суде́бное разбира́тельство** суд тикшереүе

**СУДЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое судья(лар) ...ы; **суде́йские обя́занности** судья бурыстары

**СУДЕ́ЙСТВО** *с*; *спорт.* судьялыҡ

**СУДИ́ЛИЩЕ** *с*; *ирон., неодобр. см.* **суд** 1, 3, 4

**СУДИ́МОСТЬ** *ж*; *юр.* хөкөм ителгәнлек, хөкөмдә булыу, хөкөмгә тартылыу; **име́ть суди́мость** хөкөмгә тартылған булыу

**СУДИ́ТЬ 1.** *несов. о ком-чём* и *без доп.* фекер йөрөтөү, уйлау; **суди́ть по вне́шности** тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап фекер йөрөтөү **2.** *несов. кого-что* хөкөм итеү; **суди́ть престу́пника** енәйәтсене хөкөм итеү **3.** *несов. кого-что*; *разг.* (*осуждать*)

ғәйепләү, яманлау, тикшереү; **не бу́дем суди́ть её стро́го** уны артыҡ ғәйепләмәйек **4.** *несов. что* и *без. доп.*; *спорт.* судья вазифаһын үтәү **5.** *сов.*, *несов. что* и *с неопр.* яҙыу, насип булыу; **ви́дно, не сужденó им встре́титься** күрәһең, уларға осрашырға яҙмаған ♦ **суди́ть да ряди́ть** *прост.* фекер йөрөтөү

**СУДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *с кем* (*вести тяжбу*) судлашыу, даулашыу; **суди́ться из-за иму́щества** милек өсөн судлашыу **2.** *страд. от* **суди́ть** 2—4

**СУ́ДНО I** *с* судно (*пароход*, *карап*, *баржа һ.б.*); **су́дно на подво́дных кры́льях** һыу аҫты ҡанатлы судноһы

**СУ́ДНО II** *с*; *мед.* ярау итеү һауыты

**СУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое суд ...ы, хөкөм ...ы ♦ **Су́дный день** *рел.* Ҡиәмәт көнө, Хисап көнө

**СУДОВОДИ́ТЕЛЬ** *м* судно йөрөтөүсе

**СУДОВОЖДЕ́НИЕ** *с* судно йөрөтөү

**СУДОВО́Й,** -ая, -ое судно ...ы; **судово́й меха́ник** судно механигы

**СУДО́К** *м* **1.** (*чашка*, *миска*) һауыт (*ҡаймаҡ һ.б. һалыу өсөн*) **2.** (*столовый прибор*) судок (*борос*, *тоҙ һауыттарын бергә ҡуя торған оя*) **3.** *мн.* **судки́** судок (*береһенең өҫтөнә икенсеһе ултыртылған ваҡ аш сеңәтәләре*)

**СУДОМО́ЙКА** *ж* һауыт-һаба йыуыусы (*ҡатын-ҡыҙ*)

**СУДОПРОИЗВО́ДСТВО** *с*; *юр.* суд эштәрен (хөкөм эштәрен) башҡарыу

**СУДОРЕМО́НТ** *м* суднолар ремонтлау

**СУДОРЕМО́НТНЫЙ,** -ая, -ое суднолар ремонтлау ...ы; **судоремо́нтный заво́д** суднолар ремонтлау заводы

**СУ́ДОРОГА** *ж* тартышыу; (*конечностей*) көҙән йыйырыу; **би́ться в су́дорогах** тартышып үрһәләнеү; **своди́ть но́ги су́дорогой** аяҡты көҙән йыйырыу

**СУ́ДОРОЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көҙән йыйырыулы, тартышыу ...ы **2.** *перен.* ашыҡ-бошоҡ; **су́дорожные сбо́ры** ашыҡ-бошоҡ йыйыныу

**СУДОСТРОЕ́НИЕ** *с* судно төҙөү

**СУДОУСТРО́ЙСТВО** *с*; *юр.* суд ҡоролошо

**СУДОХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое судоходство өсөн; **судохо́дная река́** судоходство өсөн йылға

**СУДОХО́ДСТВО** *с* судоходство; **морско́е судохо́дство** диңгеҙ судоходствоһы

**СУДЬБА́** *ж* **1.** яҙмыш, күрәсәк, тәҡдир; **предопределя́ться судьбо́й** тәҡдиргә яҙылыу **2.** *обычно мн.* **су́дьбы** күрәсәк, яҙмыш; **истори́ческие су́дьбы наро́дных пе́сен** халыҡ йырҙарының тарихи яҙмышы ♦ **каки́ми судьба́ми?** ниндәй елдәр ташланы?; **на произво́л судьбы́** яҙмыш ҡарамағына; **не судьба́** *кому-чему* и *с неопр.* яҙмаған, насип булмаған; **иро́ния судьбы́** *см.* **иро́ния**

**СУДЬБИ́НА** *ж*; *уст.*, *трад.-поэт.* *см.* **судьба́** 1

**СУДЬЯ́** *м* **1.** судья, хөкөмдар; **наро́дный судья́** халыҡ судьяһы **2.** *спорт.* судья; **судья́ пе́рвой катего́рии** беренсе категориялы судья

**СУЕВЕ́РИЕ** *с* хөрәфәт, төрлө ырымдарға ышаныу

**СУЕВЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** хөрәфәткә (төрлө ырымдарға) ышаныусан; **суеве́рный челове́к** хөрәфәткә ышаныусан кеше **2.** хөрәфәти; **суеве́рные приме́ты** хөрәфәти ырымдар (юрауҙар)

**СУЕТА́** *ж* **1.** (*мелочные житейские интересы*) юҡ-бар эш, юҡ-бар нәмә **2.** (*хлопоты*, *беготня*) мәшәҡәт, ығы-зығы; **пра́здничная суета́** байрам мәшәҡәттәре ♦ **суета́ суе́т** *см.* **суета́** 1

**СУЕТИ́ТЬСЯ** *несов.* ығы-зығыланыу, ығы-зығы килеү, сабыулау, сәбәләнеү; **суети́ться по хо́зяйству** хужалыҡ буйынса ығы-зығы килеү; **суети́ться без причи́ны** юҡҡа сәбәләнеү

**СУЕТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ығы-зығы килеүсән, сәбәлән; **суетли́вый челове́к** ығы-зығы килеүсән кеше **2.** (*торопливый*) ығы-зығылы, ашыҡ-бошоҡ; **суетли́вые движе́ния** ығы-зығылы хәрәкәттәр

**СУ́ЕТНОСТЬ** *ж* **1.** (*ничтожность*) юҡ-бар **2.** ығы-зығы; **су́етность жи́зни** тормош ығы-зығыһы

**СУ́ЕТНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* **1.** юҡ-бар, буш; **су́етные жела́ния** буш теләктәр **2.** ығы-зығылы, тынысһыҙ; **су́етный день** ығы-зығылы көн

**СУЕТНЯ́** *ж*; *разг.* *см.* **суета́** 2

**СУЖА́ТЬ** *несов.* *см.* **су́зить**

**СУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **су́зиться** **2.** *страд. от* **сужа́ть**

**СУЖДЕ́НИЕ** с **1.** (*мнение*) фекер, фекер йөрөтөү; **самостоя́тельность сужде́ний** фекерҙәрҙең үҙаллылығы; **де́тское сужде́ние** балаларса фекер йөрөтөү; **ра́зные сужде́ния** төрлө фекер **2.** (*заключение*) хөкөм; **выска́зывать сужде́ние** хөкөм сығарыу **3.** *лог.*, фекер, һығымта

**СУЖЕ́НИЕ** *с* *см.* **су́зить** — **сужа́ть**, **су́зиться** — **сужа́ться**; **суже́ние кровено́сного сосу́да** ҡан тамырының тарайыуы

**СУ́ЖЕНЫЙ** *м*; *уст.*, *трад.-поэт.* кейәү, йәрәшелгән егет; **су́женая** *ж*; *уст.*, *трад.-поэт.* кәләш, йәрәшелгән ҡыҙ

**СУ́ЖИВАТЬ** *несов.* *см.* **су́зить**

**СУ́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **су́зиться** **2.** *страд. от* **су́живать**

**СУ́ЗИТЬ** *сов.* *что* **1.** тарайтыу; **су́зить пла́тье** күлдәкте тарайтыу **2.** сикләү; **су́зить де́ятельность** эшмәкәрлекте сикләү **3.** ҡыҫҡартыу, кәметеү; **су́зить те́му** теманы ҡыҫҡартыу

**СУ́ЗИТЬСЯ** *сов.* **1.** тарайыу; **доли́на су́зилась** үҙән тарайған **2.** (*ограничиться*) сикләнеү

**СУК** *м* ботаҡ; **сиде́ть на суку́** ботаҡта ултырыу

**СУ́КА** *ж* **1.** кәнтәй (*инә эт*, *бүре*, *төлкө һ.б.*) **2.** *груб.-прост.* кәнтәй (*әрләү һүҙе*)

**СУКНО́** *с* (*фабричное*) буҫтау; (*домотканое*) тула; (*толстое*, *грубое*) мәллә; **валя́ть сукно́** тула баҫыу ♦ **класть под сукно́** ҡарамай яткырыу, ҡарауҙы һуҙыу

**СУКНОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое буҫтау (тула) баҫыу ...ы, буҫтау баҫҡанда ҡулланылған; **сукно-**

**ва́льная маши́на** буҫтау баҫыу машинаһы; **сукнова́льная гли́на** буҫтау баҫҡанда ҡулланылған балсыҡ

**СУКНОВА́ЛЬНЯ** *ж* буҫтау (тула) баҫыу оҫтаханаһы

**СУКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое ботаҡлы, ботаҡ-сатаҡлы; **сукова́тая па́лка** ботаҡлы таяҡ

**СУКО́НКА** *ж* буҫтау (тула) киҫәге

**СУКО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тула, буҫтау; **суко́нные брю́ки** тула салбар; **суко́нное пальто́** буҫтау пальто **2.** буҫтау ...ы; **суко́нная фа́брика** буҫтау фабрикаһы ♦ **суко́нный язы́к**; **суко́нная речь** аҡас тел

**СУ́КРОВИЦА** *ж* һүл, ҡанлы эрен, яра бүлендеге; **из ра́ны сочи́тся су́кровица** яранан һүл һарҡа

**СУ́КРОВИЧНЫЙ,** -ая, -ое һүлле, ҡанлы эрен ...ы; **су́кровичные пя́тна** ҡанлы эрен таптары

**СУЛЕМА́** *ж* сулема (*ағыулы матдә*)

**СУЛИ́ТЬ** *несов. что* **1.** *разг.* (*обещать*) вәғәҙә итеү, ышандырыу **2.** *что* (*предвещать*) (алдан) күрһәтеү, әйтеп тороу

**СУЛТА́Н I** *м* (*титул*) солтан, батша

**СУЛТА́Н II** *м* (*украшение*) солтан (*баш кейеменә ҡаҙап ҡуйыла торған ҡауырһын, сәс, ҡыл суҡ*)

**СУЛЬФА́ТЫ** *мн.* (*ед.* **сульфа́т** *м*); *хим.* сульфаттар (*көкөрт әсемәһе тоҙҙары*)

**СУЛЬФИ́ДЫ** *мн.* (*ед.* **сульфи́д** *м*) сульфидтар

**СУЛЬФИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **сульфи́т** *м*); *хим.* сульфиттар (*көкөртлө әсемә тоҙҙары*)

**СУМА́** *ж* **1.** *см.* **су́мка** 1; **2.** муҡса (*хәйерселек билдәһе*) ♦ **пусти́ть с сумо́й** бөлдөрөү; **ходи́ть с сумо́й** хәйерселәү

**СУМАСБРО́Д** *м* и **СУМАСБРО́ДКА** *ж*; *разг.* дыуамал (кеше)

**СУМАСБРО́ДНИЧАТЬ** *несов.* дыуамалланыу

**СУМАСБРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое дыуамал; **сумасбро́дный челове́к** дыуамал кеше

**СУМАСБРО́ДСТВО** *с* дыуамаллыҡ

**СУМАСШЕ́ДШИЙ,** -ая, -ее **1.** аҡылдан яҙған, тиле, диуана, хыялый; **сумасше́дший челове́к** аҡылдан яҙған кеше; **стать сумасше́дшим** хыялыйға әйләнеү **2.** *в знач. сущ.* **сумасше́дший** *м* и **сумасше́дшая** *ж* аҡылдан яҙған кеше, диуана (кеше) **3.** *разг.* (*безрассудный*) аҡылһыҙ, дыуамал **4.** *разг.* (*исключительный по величине, силе, степени проявления*) сиктән тыш ҙур (юғары), аҡылға һыймаҫлыҡ; **сумасше́дшие це́ны** сиктән тыш юғары хаҡтар

**СУМАСШЕ́СТВИЕ** *с* **1.** (*потеря рассудка*) аҡылдан яҙыу, хыялыйлыҡ, диуаналыҡ **2.** *разг.* (*безрассудство*) аҡылһыҙлыҡ, дыуамаллыҡ ♦ **до сумасше́ствия** бик, үтә, аҡылдан яҙырлыҡ дәрәжәлә

**СУМАТО́ХА** *ж* **1.** (*суета*) ығы-зығы; **в сумато́хе** ығы-зығы эсендә **2.** (*переполох*) сыуалыш, мәхшәр; **подняла́сь сумато́ха** мәхшәр ҡупты

**СУМАТО́ШЛИВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **сумато́шный**

**СУМАТО́ШНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*о человеке*) ығы-зығылы, ҡаңғырыҡ; **сумато́шный челове́к** ҡаңғырыҡ кеше **2.** шау-шыулы, ығы-зығылы; **сумато́шный день** шау-шыулы көн; **сумато́шная жизнь** ығы-зығылы тормош

**СУМБУ́Р** *м* буталсыҡлыҡ, сыуалсыҡлыҡ

**СУМБУ́РНЫЙ,** -ая, -ое сыуалсыҡ, буталсыҡ

**СУ́МЕРЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** эңер ...ы, эңер-меңер; **су́меречный час** эңер ваҡыты **2.** ярым ҡараңғы; **су́меречный день** ярым ҡараңғы көн **3.** *перен.* (*безрадостный*) күңелһеҙ, төшөнкө; **су́меречная жизнь** күңелһеҙ тормош; **су́меречное настрое́ние** төшөнкө кәйеф **4.** *зоол.* эңер ...ы ♦ **су́меречное состоя́ние** *мед.* миңрәүлек хәле (*психик ауырыуҙан*)

**СУ́МЕРКИ** *мн.* ҡараңғылыҡ, ҡараңғы; (*вечерние*) эңер, аҡшам; **наступле́ние вече́рних су́мерек** эңер төшөү; **у́тренние су́мерки** таң ҡараңғыһы

**СУ́МЕРНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* эңерҙә утһыҙ ғына һөйләшеп ултырыу

**СУМЕ́ТЬ** *сов. с неопр.* алыу, эшләй (булдыра) алыу, ҡулдан килеү, белеү; **суме́ть отве́тить** яуап бирә алыу; **суме́ть сде́лать** эшләй алыу

**СУ́МКА** *ж* **1.** муҡса, сумка; (*кожаная*) сәрмә; (*перемётная*) артмаҡ; **хозя́йственная су́мка** хужалыҡ муҡсаһы **2.** *анат.* ҡап, муҡса; **су́мка суста́ва** быуын ҡабы **3.** *зоол.* муҡса (*ҡайһы бер йәнлектәрҙә*) ♦ **пасту́шья су́мка** *см.* **пасту́ший**

**СУ́ММА** *ж* **1.** *мат.* ҡушылдыҡ, сумма; **су́мма трёх чи́сел** өс һандың ҡушылдығы; **су́мма рациона́льных дробе́й** рациональ кәсерҙәрҙең суммаһы **2.** (*общее количество*) йыйылма, барыһы, барлығы, сумма; **су́мма всех да́нных** бөтә мәғлүмәттәрҙең йыйылмаһы **3.** (*количество денег*) сумма, аҡса; **кру́пная су́мма** ҙур сумма

**СУММА́РНЫЙ,** -ая, -ое суммалар, дөйөм, дөйөмләштерелгән, бөтөнөһө бергә; **сумма́рное число́** дөйөмләштерелгән һан; **сумма́рные да́нные** дөйөм мәғлүмәт

**СУММИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* **1.** *мат.* сумманы иҫәпләп сығарыу; **сумми́ровать чи́сла** һандарҙың суммаһын иҫәпләп сығарыу **2.** (*обобщать*) дөйөмләштереү, һөҙөмтә сығарыу; **сумми́ровать о́пыт** тәжрибәне дөйөмләштереү

**СУММИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов.*, *несов.* дөйөмләшеү **2.** *только несов. страд. от* **сумми́ровать**

**СУ́МНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* аҡыл һатыу

**СУМНЯ́СЯ** и **СУМНЯ́ШЕСЯ: ничто́же сумня́шеся** *см.* **ничто́же**

**СУ́МОЧКА** *ж*; *уменьш. от* **су́мка** 1

**СУ́МРАК** *м* ярым ҡараңғылыҡ; (*вечерний*) эңер

**СУ́МРАЧНОСТЬ** *ж* **1.** (*сумрак*) ярым ҡараңғылыҡ; (*вечерний сумрак*) эңер **2.** *перен.* (*мрачность*) ҡараңғы сырайлыҡ, күңелһеҙлек

**СУ́МРАЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*окутанный мраком*) ярым ҡараңғы, ҡараңғылы-яҡтылы; **су́мрачный лес** ярым ҡараңғы урман **2.** йонсоу, болотло; **су́мрачный день** йонсоу көн **3.** *перен.* ҡараң-

ғы сырайлы, күңелһеҙ; **су́мрачный челове́к** ҡараңғы сырайлы кеше

**СУ́МЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *зоол.*, *бот.* муҡсалы; **су́мчатые млекопита́ющие** муҡсалы имеҙеүселәр **2.** *в знач. сущ.* **су́мчатые** *мн.*; *зоол.* муҡсалылар

**СУМЯ́ТИЦА** *ж*; *разг.* ығы-зығы, шау-шыу, мәхшәр

**СУНДУ́К** *м* һандыҡ; **желе́зный сунду́к** тимер һандыҡ; **узо́рчатый сунду́к** семәрле һандыҡ

**СУНДУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое һандыҡ ...ы; **сунду́чный замо́к** һандыҡ йоҙағы

**СУ́ННА** *ж*; *рел.* Сөннә

**СУННИ́ЗМ** *м* (*одно из главных направлений ислама*) сөнниселек

**СУННИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **сунни́т** *м*) сөнниселәр

**СУ́НУТЬ** *сов. см.* **сова́ть**

**СУ́НУТЬСЯ** *сов. см.* **сова́ться** 1

**СУП** *м* аш, һурпа; **мясно́й суп** итле аш

**СУПЕРМЕ́Н** *м*; *ирон.* супермен (*үҙен бөтәһенән дә өҫтөн һанаған кеше*)

**СУПЕРОБЛО́ЖКА** *ж* суперобложка, супертышлыҡ (*китаптың ҡатырға тышлығы өҫтөнә ҡапланған ҡағыҙ тыш*)

**СУПЕРФОСФА́Т** *м* суперфосфат (*ашлама*); **двойно́й суперфосфа́т** икеләтелгән суперфосфат

**СУПЕРЭЛИ́ТА** *ж*; *с.-х.* суперэлита (*иң юғары сифатлы орлоҡ*)

**СУ́ПЕСОК** *м см.* **су́песь**

**СУПЕСЧА́НЫЙ,** -ая, -ое ҡомло, ҡомһол; **супесча́ная по́чва** ҡомло тупраҡ

**СУ́ПЕСЬ** *ж*; *спец.* ҡомло тупраҡ (*составында 60—80% ҡом булған*)

**СУПОВО́Й,** -ая, -ое **1.** һурпа ...ы; **супова́я ми́ска** һурпа сеүәтәһе **2.** һурпалыҡ; **суповóе мя́со** һурпалыҡ ит

**СУПО́НИТЬ** *несов. кого-что* тамаҡбауҙы тартыу (*ат еккәндә*)

**СУПО́НЬ** *ж* тамаҡбау, сөйөлдөрөк, түшелдерек (*ҡамытта*); **распусти́ть супо́нь** тамаҡбауҙы бушатыу

**СУПОРО́САЯ** и **СУПОРО́СНАЯ** быуаҙ (*сусҡаға ҡарата*)

**СУПОРО́СНОСТЬ** *ж* быуаҙлыҡ (*сусҡаға ҡарата*)

**СУПОСТА́Т** *м* **1.** *уст.*, *высок.* дошман, яуыз (кеше) **2.** *прост.* алама, эшәке (кеше)

**СУПРУ́Г** *м* **1.** ир, иптәш **2.** *мн.* **супру́ги** ирле-ҡатынлы, ир-ҡатын, ир менән ҡатын

**СУПРУ́ГА** *ж* ҡатын, йәмәғәт, хәләл ефет, иптәш

**СУПРУ́ЖЕСКИЙ,** -ая, -ое ирле-ҡатынлы, ир менән ҡатын ...ы; **супру́жеская жизнь** ир менән ҡатын тормошо

**СУПРУ́ЖЕСТВО** *с* ғаилә ҡороу, ирле-ҡатынлы йәшәү, ирле-ҡатынлы булыу

**СУРГУ́Ч** *м* сургуч, һурғыс

**СУРГУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һурғыс ...ы, сургуч ...ы; **сургу́чный за́пах** һурғыс еҫе **2.** һурғыс, сургуч, һурғыстан яһалған; **сургу́чная печа́ть** һурғыс мөһөр

**СУРДИ́НКА: под surdи́нку**: 1) шым, тауыштын сығармай; 2) (*тайком*) аҫтыртын, йәшерен, йәшертен

**СУРДОКА́МЕРА** *ж* сурдокамера (*космонавтарҙы абсолют тынлыҡта эшләргә әҙерләү өсөн файҙаланыла торған махсус бүлмә*)

**СУРДОПЕДАГО́ГИКА** *ж* сурдопедагогика (*колаҡҡа ҡаты йәки ишетмәгән балаларҙы тәрбиәләү һәм уҡытыу тураһындағы фән*)

**СУРЕ́ПКА** *ж* тиле шалҡан, бүҙәнә ҡуҙағы (*ҡый үләне*)

**СУРЕ́ПНЫЙ,** -ая, -ое тиле шалҡан ...ы; **суре́пное ма́сло** тиле шалҡан майы

**СУ́РЖА** и **СУ́РЖИК** *ж*; *с.-х.* бойҙайлы арыш (*көҙгө бойҙай менән арыш ҡатнашмаһы*)

**СУ́РИК** *м* сурик (*ҡыҙыл һары йәки ҡыҙыл көрән буяу*)

**СУ́РИКОВЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙғылт һары, ҡыҙғылт көрән

**СУРКО́ВЫЙ,** -ая, -ое байбаҡ ...ы; **сурко́вая но́рка** байбаҡ өңө

**СУРО́ВЕТЬ** *несов.* ҡырыҫлана (киҫкенләшә, ҡатылана) барыу (төшөү)

**СУРО́ВОСТЬ** *ж* **1.** ҡатылыҡ, һалҡынлыҡ; **суро́вость зимы́** ҡыштың һалҡынлығы **2.** ауырлыҡ, ҡатылыҡ; **суро́вость слов** һүҙҙәрҙең ауырлығы **3.** *перен.* ҡатылыҡ, ҡырыҫлыҡ; **суро́вость хара́ктера** холоҡтоң ҡырыҫлығы; **суро́вость наказа́ния** язаның ҡатылығы

**СУРО́ВЫЙ I,** -ая, -ое **1.** (*о человеке*) ҡырыҫ, ҡаты күңелле, уҫал; **суро́вый челове́к** ҡырыҫ кеше **2.** (*трудный для жизни*) ҡаты, һалҡын; **суро́вая зима́** һалҡын ҡыш **3.** ҡаты; **суро́вая кри́тика** ҡаты тәнҡит **4.** (*тяжёлый*) ауыр, әсе; **суро́вая до́ля** әсе яҙмыш

**СУРО́ВЫЙ II,** -ая, -ое (*грубый, небелёный — о ткани и т.п.*) сей, ағартылмаған; **суро́вое полотно́** сей киндер туҡыма

**СУРО́К** *м* һыуыр, байбаҡ (*йәнлек*)

**СУРРОГА́Т** *м* суррогат (*үҙенең ҡайһы бер сифаттары менән генә ысын продуктты һ.б. алмаштыра ала торған нәмә*)

**СУРРОГА́ТНЫЙ,** -ая, -ое суррогат; **суррога́тный проду́кт** суррогат продукт

**СУРЬМА́** *ж* (*металл, краска*) һөрмә; **о́кись сурьмы́** *хим.* һөрмә әсемәһе

**СУРЬМИ́ТЬ** *несов. что* һөрмәләү, һөрмә яғыу (тартыу); **сурьми́ть бро́ви** ҡашҡа һөрмә тартыу

**СУСА́К** *м* сәскәғамыш; **суса́к зо́нтичный** сатырлы сәскәғамыш

**СУСА́ЛЬ** *ж собир.*; *спец.* сусаль (*биҙәү эшендә ҡулланылған йоҡа ғына алтын-көмөш пластина*)

**СУСА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сусаль; **суса́льное зо́лото** сусаль алтын **2.** *перен.* артыҡ сөсө; **суса́льные разгово́ры** артыҡ сөсө һүҙҙәр

**СУ́СЛИК** *м* йомран; **су́слик-свисту́н** сәкей

**СУ́СЛИЧИЙ,** -ья, -ье йомран ...ы; **су́сличья шку́ра** йомран тиреһе

**СУ́СЛО** *с* **1.** һоҫла (*араҡы, һыра яһай торған ҡуйы шыйыҡлыҡ*) **2.** (*сок из отжимаемого винограда*) йөҙөм һуты

**СУСЛО́Н** *м*; *с.-х.*, *обл.* һоҫлан, ҡаҙғанат; **поста́вить снопы́ в сусло́н** көлтәне ҡаҙғанатҡа ултыртыу

**СУСПЕ́НЗИЯ** *ж*; *физ.*, *тех.* суспензия

**СУСТА́В** *м* быуын; **локтево́й суста́в** терһәк быуыны; **тазобе́дренный суста́в** янбаш-бот быуыны

**СУСТАВНО́Й,** -ая, -ое быуын ...ы; **суставно́й ревмати́зм** быуын ревматизмы

**СУСТА́ВЧАТЫЙ,** -ая, -ое *биол.*, *тех.* быуынлы, быуынтыҡлы, быуын-быуын; **суста́вчатый сте́бель** быуынтыҡлы һабаҡ; **суста́вчатые тру́бы** быуынлы торбалар

**СУТА́НА** *ж* сутана (*католик руханиҙарының өҫ кейеме*)

**СУТЕНЁР** *м* сутенёр

**СУ́ТКИ** *мн.* тәүлек; **дво́е су́ток** ике тәүлек

**СУ́ТОЛОКА** *ж*; *разг.* ығы-зығы, этеш-төртөш

**СУ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәүлек, тәүлеклек, тәүлек эсендәге; **су́точный срок** тәүлеклек срок; **су́точный удо́й** тәүлек һауым; **су́точный за́работок** тәүлеклек эш хаҡы; **су́точное враще́ние Земли́** *астр.* Ерҙең тәүлек әйләнәһе **2.** *в знач. сущ.* **су́точные** *мн.* тәүлек аҡсаһы

**СУТУ́ЛИТЬ** *несов. что* бөкрәйтеү, көмрәйтеү

**СУТУ́ЛИТЬСЯ** *несов.* көмрәйеү, бөкрәйеү, көмрөләнеү

**СУТУ́ЛОСТЬ** *ж* көмрөлөк, бөкрөлөк

**СУТУ́ЛЫЙ,** -ая, -ое көмрө, бөкрө; **суту́лый челове́к** бөкрө кеше

**СУТЬ I** *ж* айыш, асыл, нигеҙ; **разобра́ться в су́ти** айышына төшөнөү; **суть пробле́мы** эштең нигеҙе ♦ **по су́ти де́ла** асылда, ысынында

**СУТЬ II** *ж*; *книжн.* (*в 3 л. ед. и мн. ч. наст. вр. — от "быть"*) булыу, булып тороу, һаналыу; **они́ суть ра́зные фо́рмы одного́ явле́ния** улар бер үк күренештең айырым формалары булып тора ♦ **э́то не суть ва́жно** быны ң әһәмиәте әллә ни ҙур түгел

**СУТЯ́ГА** *м* и *ж*; *разг. см.* **сутя́жник**

**СУТЯ́ЖНИК** *м* и **СУТЯ́ЖНИЦА** *ж* дәғүәсе (даусы, ғауғасыл, дәғүәләшергә яратыусы) кеше

**СУТЯ́ЖНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* дәғүәләшеү, даулашыу, ғауғалашыу, судлашыу

**СУТЯ́ЖНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое дәғүәсегә хас

**СУТЯ́ЖНИЧЕСТВО** *с* дәғүәселлек, судлашып йөрөү

**СУТЯ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*склонный к сутяжничеству*) даусыл, дәғүәсел, ғауғасыл (*кеше*); **сутя́жный челове́к** даусыл кеше **2.** даулы, дәғүәле (*эш һ.б.*); **сутя́жное де́ло** дәғүәле эш

**СУФИ́ЗМ** *м* суфыйсылыҡ (*ислам динендә мистик йүнәлеш*)

**СУ́ФИЙ** *м* суфый (*суфыйсылыҡ яҡлы кеше*)

**СУФИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое суфыйсылыҡ ...ы, суфыйҙар; **суфи́йская литерату́ра** суфыйсылыҡ әҙәбиәте

**СУФЛЕ́** *с нескл.* суфле (*тәм-том эшләүҙә ҡулланылған йомортҡалы тәмләткес*)

**СУФЛЁР** *м* суфлёр (*сәхнәлә актерҙарға ролдәрҙең һүҙҙәрен әйтеп тороусы*)

**СУФЛЁРСКИЙ,** -ая, -ое суфлёр ...ы; **суфлёрская бу́дка** суфлёр будкаһы

**СУФЛИ́РОВАТЬ** *несов.* суфлёрлыҡ итеү, суфлёр булыу

**СУ́ФФИКС** *м*; *грам.* суффикс (*һүҙ яһаусы ялғау*)

**СУФФИКСА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* суффиксаль, суффиксы булған, суффикслы

**СУХА́РНИЦА** *ж* шөкәрә һауыты

**СУХА́РНЫЙ,** -ая, -ое шөкәрә ...ы, шөкәрәнән яһалған; **суха́рный квас** шөкәрә кеүәҫе

**СУХА́РЬ** *м* **1.** сохарый, шөкәрә; **ржано́й суха́рь** арыш шөкәрәһе; **суши́ть сухари́** сохарый киптереү **2.** *перен.*, *разг.* (*о чёрством человек*) ҡоро (ҡаты күңелле) кеше; **быть сухарём** ҡоро кеше булыу

**СУ́ХО 1.** *нареч.* (*холодно, сдержанно*) ҡоро, һалҡын; **су́хо отвеча́ть** ҡоро яуап биреү **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* (*о сухой погоде*) ҡоро; **на у́лице су́хо** тышта ҡоро

**СУХОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое ҡорораҡ

**СУХОВЕ́Й** *м* ҡыуан, ҡыуан (эҫе) ел

**СУХОГРУ́З** *м* ҡоро йөк ташый торған карап

**СУХОГРУ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое ҡоро йөк ташый торған; **сухогру́зная ба́ржа** ҡоро йөк ташый торған баржа

**СУХОДО́Л** *м* сағыл, ҡоро үҙән, ҡул

**СУХОДО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сағыл ...ы; **суходо́льная расти́тельность** сағыл үҫемлектәре

**СУХОЖИ́ЛИЕ** *с* тарамыш, һеңер; **сухожи́лия рук** ҡул тарамыштары

**СУХО́Й,** -ая, -ое **1.** (*не сырой*) ҡоро, кипкән; **сухо́й ве́тер** ҡоро ел; **сухи́е фру́кты** кипкән емештәр **2.** ҡоро, ҡороған; **суха́я ве́тка** ҡороған ботаҡ **3.** ҡорғаҡ, ҡоро; **суха́я пого́да** ҡорғаҡ көн **4.** *разг.* (*худощавый*) сандыр, ҡоро һөйәкле, ябыҡ **5.** *перен.* ҡыҙыҡ булмаған, ҡоро, һалҡын; **сухо́й расска́з** ҡыҙыҡ булмаған хикәйә; **сухо́й приём** һалҡын ҡаршы алыу **6.** *спец.* ҡоролай; **суха́я перего́нка** ҡоролай ҡыуыу **7.** (*приготовленный в виде порошка или концентрата*) киптерелгән, кипкән; **сухо́е молоко́** киптерелгән һөт **8.** *мед.* (*без жидких выделений*) ҡоро; **сухо́й ка́шель** ҡоро йүтәл ♦ **суха́я гроза́** ямғырһыҙ йәшен; **сухи́м путём** ҡоро ерҙән; **сухо́е вино́** йөҙөм шарабы; **сухо́й зако́н** араҡы эсеү тыйылған

**СУХОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *бот.* ҡороға сыҙам, ҡоро һөйәр (*ҡоро урындарҙа үҫеүгә яраҡлашҡан үҫемлек*)

**СУХОМЯ́ТКА** *ж*; *разг.* ҡоро-һары; **жить на сухомя́тке** ҡоро-һары менән тороу

**СУХОПА́РЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ябыҡ; (*о человеке*) сандыр, ҡаҡса; (*о животных*) ҡаңғыл; **сухопа́рая ло́шадь** ябыҡ ат; **сухопа́рый стари́к** сандыр ҡарт

**СУХОПУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое ҡоро ер ...ы; **сухопу́тный тра́нспорт** ҡоро ер транспорты

**СУХОПУ́ТЬЕ** *с*; *разг.* ҡоро ер юлы

**СУХОРУ́КИЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡороған (кипкән) ҡуллы, ҡулы ҡороған

**СУХОСТО́Й** *м* **1.** *собир.* ҡоро-һары, ҡыу ағас, ҡыуа (*тамыры ҡороған*); **собира́ть сухосто́й** ҡоро-һары йыйыу **2.** *с.-х.* һыуалған (*һыйырға ҡарата*)

**СУХОСТО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыу; **сухосто́йное де́рево** ҡыу ағас **2.** *с.-х.* һөт бирмәгән, һыуалған; **сухосто́йный пери́од** һыуалған осор

**СУ́ХОСТЬ** *ж* ҡоролоҡ, кипкәнлек; **су́хость ли́стьев** япраҡ ҡоролоғо; **су́хость во́здуха** һауаның ҡоролоғо

**СУХОТА́** *ж* **1.** *прост.* (*сухость*) кипкәнлек, кибеү, ҡороу; **сухота́ во рту** ауыҙ кибеү **2.** *разг.* (*сушь*) ҡоролоҡ, ҡоро эҫе һауа

**СУХОФРУ́КТЫ** *мн.* кипкән еләк-емеш, киптерелгән емештәр

**СУХОЩА́ВОСТЬ** *ж* сандырлыҡ, ябыҡлыҡ, ҡаҡсалыҡ

**СУХОЩА́ВЫЙ,** -ая, -ое ябыҡ, сандыр, ҡаҡса; **сухоща́вый челове́к** ҡаҡса кеше

**СУЧЁНЫЙ,** -ая, -ое сиратылған, ҡатылған (*еп тураһында*)

**СУЧИ́ЛО** *с* ҡалтырса (*киндер, тула һуҡҡанда сүрегә еп урай торған ҡорал*)

**СУЧИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое еп сиратыу ...ы, еп ҡатыу ...ы; **сучи́льный аппара́т** еп сиратыу аппараты

**СУЧИ́ТЬ** *несов.* *что* сиратыу, еп ҡатлау; **сучи́ть ни́тки** еп сиратыу; **сучи́ть ту́го** сираҡ итеп сиратыу

**СУ́ЧКА** *ж см.* **су́ка**

**СУЧКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое ботаҡлы

**СУЧКОРЕ́З** *м* ботаҡ ҡырҡҡыс (*машина*)

**СУЧО́К** *м* (ваҡ) ботаҡ; **разветвлённый сучо́к** тарбаҡлы ботаҡ ♦ **ни сучка́, ни задо́ринки** *см.* **задо́ринка**

**СУ́ША** *ж* ҡоро, ҡоро ер; **на су́ше и на мо́ре** ҡоро ерҙә һәм диңгеҙҙә

**СУШЕ́НИЕ** *с см.* **суши́ть** 1, 2; **суше́ние фру́ктов** емештәр киптереү

**СУШЕНИ́ЦА** *ж* кипкәр (*дарыу үләне*)

**СУШЁНЫЙ,** -ая, -ое кипкән, киптерелгән; (*вяленый*) ҡаҡлаған; **сушёные фру́кты** кипкән емеш

**СУШЕ́НЬЕ** *с* киптерелгән еләк-емеш, кипкән еләк-емеш

**СУШИ́ЛКА** *ж* **1.** (*приспособление для сушки*) киптергес; **паро́вая суши́лка** пар киптергесе **2.** (*помещение*) киптереү урыны (бүлмәһе)

**СУШИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое киптереү ...ы, киптереп әҙерләү ...ы; **суши́льный шкаф** киптереү шкафы

**СУШИ́ЛЬНЯ** *ж см.* **суши́лка**

**СУШИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* киптереү; **суши́ть бельё** кер киптереү **2.** *что* киптереү, ҡоротоу; **суши́ть се́но** бесән киптереү **3.** *кого*; *перен.* (*мучая, делать худым, болезненным*) киптереү, ябыҡтырыу **4.** *кого-что*; *перен.* (*делать чёрствым*) ҡатырыу, шәфҡәтһеҙ итеү

**СУШИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*сушить одежду на себе*) кибенеү, өҫ-башты киптереү; **суши́ться у костра́** ут янында кибенеү **2.** (*сохнуть*) кибеү; **се́но су́шится** бесән кибә **3.** *страд. от* **суши́ть** 1, 2

**СУ́ШКА** *ж* **1.** *см.* **суши́ть** 1, 2; **су́шка зерна́** ашлыҡ киптереү; **су́шка на со́лнце** ҡояшта киптереү **2.** (*баранка*) сушка, ваҡ керәндил

**СУШЬ** *ж*; *разг.* **1.** (*жара*) ҡоро, ҡоролоҡ, йәйге селлә; **ию́льская сушь** июлдәге ҡоролоҡ **2.** *собир.* ҡоро-һары, ҡыуа, ҡыу ағас, ҡоро ботаҡ **3.** *см.* **су́ша**

**СУЩЕ́СТВЕННОСТЬ** *ж* әһәмиәтлелек, мөһимлек

**СУЩЕ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое әһәмиәтле, мөһим, етди; **суще́ственный вопро́с** мөһим мәсьәлә

**СУЩЕСТВИ́ТЕЛЬНЫЙ: и́мя существи́тельное** *грам.* исем; **существи́тельное** *с*; *грам.* исем

**СУЩЕСТВО́ I** *с* асыл, нигеҙ, төп; **существо́ вопро́са** һорауҙың нигеҙе; **существо́ де́ла** эштең асылы ♦ **говори́ть по существу́** мәсьәләнең асылын әйтеү; **по существу́ (говоря́)** *в знач. вводн. сл.* асылда, нигеҙҙә, дөрөҫө

**СУЩЕСТВО́ II** *с* зат, әҙәм, кеше, йән эйәһе; **живо́е существо́** тере йән эйәһе ♦ **всем свои́м существо́м** бөтә йәне-тәне (барлығы) менән

**СУЩЕСТВОВА́НИЕ** *с* **1.** йәшәйеш, ысынбарлыҡ, йәшәү; **существова́ние ми́ра** донъя ысынбарлығы; **фо́рмы существова́ния мате́рии** материяның йәшәү формалары **2.** йәшәү, тороу, тереклек итеү, көн күреү (итеү); **борьба́ за существова́ние** йәшәү өсөн көрәш; **сре́дства к существова́нию** йәшәү кәрәк-яраҡтары

**СУЩЕСТВОВА́ТЬ** *несов.* **1.** йәшәү, йәшәп килеү, (бар) булыу; **существу́ющие поря́дки** булған тәртиптәр; **книгопеча́тание существу́ет давно́** китап баҫыу күптән бар **2.** йәшәү, тороу; **существова́ть ра́ди дете́й** балалар хаҡына йәшәү **3.** *чем, на что* йәшәү, тереклек итеү, көн күреү (итеү); **существова́ть свои́м трудо́м** үҙ хеҙмәтең менән көн итеү

**СУ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *разг.* (*истинный*) ысын, ысын мәғәнәлә, хаҡ булған, йәшәп килгән; **су́щая пра́вда** ысын дөрөҫлөк; **су́щий вздор** ысын мәғәнәлә буш һүҙ **2.** *в знач. сущ.* **су́щее** *с см.* **бытие́** 1

**СУ́ЩНОСТЬ** *ж* асыл, төп нигеҙ; **су́щность жи́зни** тормош нигеҙе; **су́щность явле́ния** күренештең асылы ♦ **в су́щности (говоря́)** *в знач. вводн. сл.* асылда, нигеҙҙә, ысынын әйткәндә

**СУЯ́ГНАЯ** быуаҙ (*кәзә, һарыҡ*); **суя́гная коза́** быуаҙ кәзә

**СУЯ́ГНОСТЬ** *ж* быуаҙлыҡ

**СФАБРИКОВА́ТЬ** *сов. см.* **фабрикова́ть** 2, 3; **сфабрикова́ть статьи́** мәҡәләләрҙе күпләп яҙыу; **сфабрикова́ть слу́хи** ялған хәбәр таратыу

**СФА́ГНОВЫЙ,** -ая, -ое һаҙ мүге ...ы, һаҙ мүге булған (ҡаплаған); **сфа́гновый покро́в** һаҙ мүге ҡапламы; **сфа́гновый торф** һаҙ мүге торфы

**СФА́ГНУМ** *м* һаҙ мүге

**СФАЛЬШИ́ВИТЬ** *сов. см.* **фальши́вить**; **не дать сфальши́вить** ике йөҙлөләнергә бирмәү

**СФЕ́РА** *ж* **1.** сфера; **земна́я сфе́ра** Ер сфераһы **2.** *чего* сфера, өлкә; **сфе́ра де́ятельности** эшмәкәрлек өлкәһе; **сфе́ра притяже́ния плане́ты** планетаның тартыу сфераһы; **сфе́ра произво́дства** етештереү өлкәһе **3.** (*среда*) тирә-йүн, мөхит, даирә, урата; **чу́вствовать себя́ в свое́й сфе́ре** үҙ мөхитеңдә һиҙеү **4.** *мн.* **сфе́ры** сфера, даирәләр; **вы́сшие сфе́ры** юғары даирәләр; **дипломати́ческие сфе́ры** дипломатик сфера

**СФЕРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** шар һымаҡ (кеүек), шарға оҡшаған, түңәрәк, сферик; **сфери́ческие тела́** шар һымаҡ есемдәр **2.** *мат.* сферик; **сфери́ческая геоме́трия** сферик геометрия; **сфери́ческие треуго́льники** сферик өсмөйөштәр; **сфери́ческие фу́нкции** сферик функциялар

**СФЕРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое шар һымаҡ (кеүек), шарға оҡшаған

**СФЕРО́ИД** *м*; *спец.* сфероид (*эллипстың арҡырыға булған әйләнмәһе*)

**СФЕРОИДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* сфероидаль, сфероид формаһындағы (һымаҡ)

**СФИГМО́ГРАФ** *м* сфигмограф (*пульстың графигын яҙыусы прибор*)

**СФИГМОГРА́ФИЯ** *ж* сфигмография (*сфигмограф ярҙамында пульстың график һүрәтен алыу*)

**СФИНКС** *м* сфинкс (**1.** *Боронғо Мысырҙа кеше башлы арыҫлан һүрәтендәге таш һын* **2.** *боронғо грек мифологияһында кәүҙәһе арыҫландыҡы, башы-түше ҡатындыҡы кеүек булған, ҡаяла йәшәгән ҡанатлы зат*)

**СФОКУСИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **фокуси́ровать**

**СФОКУСИ́РОВАТЬСЯ** *сов. см.* **фокуси́роваться** 1; **внима́ние сфокуси́ровалось** *на чём-л. нимәгәлер* иғтибар тупланыу

**СФОРМИРОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** формалаштырыу; **сформирова́ть кро́ну де́рева** ағас сатырын формалаштырыу; **сформирова́ть хара́ктер** холоҡто формалаштырыу **2.** ойоштороу, төҙөү; **сформирова́ть прави́тельство** хөкүмәт төҙөү; **сформирова́ть диви́зию** дивизия ойоштороу

**СФОРМИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** формалашыу; **сформирова́лся взгляд на жизнь** тормошҡа ҡараш формалашты; **хара́ктер сформирова́лся** холоҡ формалашты **2.** ойошоу, төҙөлөү; **коллекти́в сформирова́лся** коллектив ойошто

**СФОРМОВА́ТЬ** *сов. см.* **формова́ть** 1

**СФОРМОВА́ТЬСЯ** *сов. см.* **формова́ться** 1

**СФОРМУЛИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **формули́ровать**; **сформули́ровать вы́воды** һығымталар яһау

**СФОТОГРАФИ́РОВАТЬ** *сов. см.* **фотографи́ровать**

**СФОТОГРАФИ́РОВАТЬСЯ** *сов. см.* **фотографи́роваться** 1

**СХВАТИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** эләктереү, тотоу, алыу, эләктереп (тотоп) алыу; **схвати́ть за́ руку** ҡулдан тотоп алыу; **схвати́ть ружьё** мылтыҡты эләктереү **2.** эләктереү, йоҡтороу, тейҙереү; **схвати́ть на́сморк** тымау тейҙереү **3.** *разг.* йәбешеү, тотоу, (быуып) алыу; **схвати́ло живо́т** *безл.* эскә йәбешеү; **схвати́ла лихора́дка** биҙгәк тотто **4.** *перен.*, *разг.* аңлап (тотоп, эләктереп) алыу, төшөнөү, үҙләштереү; **схвати́ть основну́ю мысль** төп фекерҙе эләктереп алыу **5.** ҡатыу; **гипс ещё не схвати́ло** гипс ҡатмаған әле

**СХВАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *за кого-что* тотоноу, тотоношоу, йәбешеү; **схвати́ться за́ руки** ҡулға-ҡул тотоношоу; **схвати́ться за ружьё** мылтыҡҡа тотоноу **2.** алышыу, айҡашыу, көрмәкләшеү; **схвати́ться с враго́м** дошман менән алышыу **3.** *разг.* (*спохватиться*) ҡапыл иҫкә төшөрөү (килеү), иҫкә төшөрөп өлгөрөү, абайлап (һиҙеп) алыу ♦ **схвати́ться за́ голову** ни эшләргә белмәү

**СХВА́ТКА** *ж* **1.** алыш, бәрелеш, һуғыш; **вооружённая схва́тка** ҡоралλы бәрелеш **2.** *спорт.* көрәш, алыш **3.** *обычно мн.* **схва́тки** ҡатыу алыу; (*родовые*) тулғаҡ (тотоу); **начали́сь схва́тки** тулғаҡ тота башланы; **схва́тки в животе́** эсте ҡатыу алыу **4.** *спец.* тотҡос, эләктергес, беркетмә

**СХВА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **схвати́ть**

**СХВА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **схвати́ться** **2.** *страд. от* **схва́тывать**

**СХЕ́МА** *ж* **1.** схема, һыҙма, һыҙым; **схе́ма радиоприёмника** радиоалғыс һыҙмаһы; **схе́ма телефо́нного аппара́та** телефон аппаратының һыҙмаһы **2.** схема; **схе́ма докла́да** доклад схемаһы; **схе́ма произведе́ния** әҫәр схемаһы

**СХЕМАТИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **схематизи́ровать**

**СХЕМАТИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* схемалаштырыу, схема рәүешендә генә биреү

**СХЕМАТИ́ЗМ** *м* схемалылыҡ, схематизм; **освободи́ться от схемати́зма** схемалылыҡтан ҡотолоу

**СХЕМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** схематик, схема рәүешендәге; **схемати́ческая ка́рта** схематик карта; **схемати́ческое изображе́ние** схема рәүешендәге һүрәт **2.** схематик; **схемати́ческий пока́з действи́тельности** ысынбарлыкты схематик күрһәтеү

**СХЕМАТИ́ЧНОСТЬ** *ж* схематиклыҡ; **схемати́чность описа́ния** тасуирлауҙың схематиклығы

**СХЕМАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **схемати́ческий** 2; **схемати́чное изложе́ние** схематик һөйләү

**СХЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое схема ...ы; **схе́мные осо́бенности телеви́зора** телевизорҙың схема үҙенсәлектәре

**СХИТРИ́ТЬ** *сов.* хәйләләү, хәйлә ҡороу, мутлашыу

**СХЛЫ́НУТЬ** *сов.* **1.** ағып китеү, кире китеү (ҡайтыу), кире ағып төшөү; **волна́ схлы́нула** тулҡын кире ағып китте **2.** *перен.* бөтөү, юҡ булыу, юҡҡа сығыу; **страх схлы́нул** ҡурҡыу юҡҡа сыҡты

**СХОД** *м* **1.** *см.* **сойти́** 1; **2.** төшөү юлы (урыны), юл, төшә торған юл (урын); **круто́й сход** текә юл **3.** сход, йыйылыш; **волостно́й сход** олоҫ сходы; **се́льский сход** ауыл йыйылышы

**СХОДИ́ТЬ I** *несов.* **1.** *см.* **сойти́** 1; **2.** (*с отрицанием*) -май/-мәй; **больно́й не схо́дит с посте́ли** ауырыу урынынан тормай; **улы́бка не схо́дит с лица́** йылмайыу йөҙөнән китмәй ♦ **не сходи́ть с языка́ (с уст)** телдән төшмәү

**СХОДИ́ТЬ II** *сов.* **1.** барып килеү, барып ҡайтыу; **сходи́ть на база́р** баҙарға барып килеү; **сходи́ть в лес** урманға барып ҡайтыу **2.** *см.* **ходи́ть** 12, 15

**СХОДИ́ТЬСЯ** *несов. см.* **сойти́сь**

**СХО́ДКА** *ж* сход, йыйылыш; **схо́дка крестья́н** крәҫтиәндәр сходы; **студе́нческая схо́дка** студенттар йыйылышы

**СХО́ДНИ** *мн.* (*ед.* **схо́дня** *ж*) баҫма (*пароходтан, кәмәнән ярға сығыу өсөн ҡуйыла торған баҫма*); **убра́ть схо́дни** баҫманы алыу

**СХО́ДНОСТЬ** *ж* **1.** оҡшашлыҡ; **схо́дность хара́ктеров** холоҡтарҙың оҡшашлығы **2.** оҫһоҙлоҡ, ярарлыҡ (*хаҡ йәһәтенән*); **схо́дность цены́** хаҡтың оҫһоҙлоғо

**СХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*похожий*) оҡшаш; **схо́дные по значе́нию слова́** мәғәнәләре яғынан оҡшаш һүҙҙәр **2.** *разг.* (*приемлемый*) оҫһоҙ, ярарлыҡ, ҡулай; **схо́дная цена́** ярарлыҡ хаҡ; **схо́дные усло́вия** ҡулай шарттар

**СХО́ДСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое *см.* **схо́дный**

**СХО́ДСТВО** *с* оҡшашлыҡ; **вне́шнее схо́дство** тышҡы оҡшашлыҡ; **схо́дство мне́ний** фекерҙәр оҡшашлығы

**СХО́ЖЕСТЬ** *ж*; *разг.* оҡшашлыҡ

**СХО́ЖИЙ,** -ая, -ее *разг. см.* **схо́дный** 1; **схо́жие имена́** оҡшаш исемдәр

**СХОЛА́СТ** *м* схоласт (**1.** *схоластика яҡлы кеше* **2.** *схоластик рәүештә фекер йөрөткән кеше*)

**СХОЛА́СТИКА** *ж* схоластика (**1.** *формаль, яһалма логик дәлилдәр ярҙамында дин догматтарына теоретик аңлатма бирең маҡсатын ҡуйған Урта быуаттағы фәлсәфәҫи йүнәлеш* **2.** *тормоштан, тәжрибәнән айырылған формаль белем; буш аҡыл һатыу*)

**СХОЛАСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** схоластик; **схоласти́ческие шко́лы** схоластик мәктәптәр **2.** схоластик, формаль; **схоласти́ческая кри́тика** схоластик тәнҡит

**СХОЛАСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **схоласти́ческий** 2

**СХОРОНИ́ТЬ** *сов. кого-что* күмеү, ерләү

**СЦАРА́ПАТЬ** *сов. кого-что* тырнау, ҡырыу, ҡырып (тырнап) алыу; **сцара́пать кра́ску** буяуҙы ҡырып алыу

**СЦАРА́ПНУТЬ** *сов. что* ҡырып (тырнап) алыу

**СЦАРА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **сцара́пать**

**СЦЕДИ́ТЬ** *сов. что* **1.** һарҡытыу; **сцеди́ть сы́воротку с тво́рога** эремсектең һыуын һарҡытыу **2.** һөҙөү, һөҙөп алыу; **сцеди́ть молоко́** һөттө һөҙөү

**СЦЕ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **сцеди́ть**

**СЦЕ́ЖИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сце́живать**

**СЦЕМЕНТИ́РОВАТЬ** *сов.* **1.** *что* цементлау, цементлап нығытыу **2.** *кого-что*; *перен.* берләштереү, нығытыу

**СЦЕ́НА** *ж* **1.** *в разн. знач.* сәхнә; **враща́ющаяся сце́на** әйләнмәле сәхнә; **ма́стер сце́ны** сәхнә оҫтаһы **2.** күренеш; **фина́льная сце́на** финал күренеше **3.** ваҡиға, күренеш; **наблюда́ть за у́личной сце́ной** урамдағы ваҡиғаны күҙәтеү **4.** (*ссора, объяснение*) *разг.* талаш, ҡыҫҡырыш, ыҙғыш, ғәләмәт; **семе́йная сце́на** ғаиләләге ыҙғыш; **сце́на ре́вности** көнләшеү ғәләмәте **5.** *перен.* (*поле деятельности*) эш, майҙан, хеҙмәт майҙаны; **вы́ступить на сце́ну всеми́рной исто́рии** донъя тарихы майҙанына сығыу ♦ **сойти́ со сце́ны** эштән ситләшеү (китеү)

**СЦЕНА́РИЙ** *м* сценарий; **написа́ть сцена́рий кинофи́льма** кинофильмдың сценарийын яҙыу

**СЦЕНАРИ́СТ** *м* сценарист (*сценарий авторы*)

**СЦЕНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сәхнә ...ы; **сцени́ческая площа́дка** сәхнә майҙаны; **сцени́ческая речь** сәхнә телмәре; **сцени́ческое иску́сство** сәхнә сәнғәте

**СЦЕНИ́ЧНОСТЬ** *ж* сәхнәлә уйнарлыҡ (ҡуйырлыҡ) булыу; **сцени́чность пье́сы** пьесаның сәхнәгә ҡуйырлыҡ булыуы

**СЦЕНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое сәхнә өсөн яраҡлы, сәхнәлә уйнарлыҡ (ҡуйырлыҡ); **пье́са не сцени́чна** пьеса сәхнәгә ҡуйырлыҡ түгел

**СЦЕ́НКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **сце́на** 1—3; **2.** бәләкәй сәхнә әҫәре

**СЦЕП** *м*; *спец.* **1.** *см.* **сцепи́ть** — **сцепля́ть 2.** ырғаҡ, эләктергес, тоташтырғыс; **ваго́нные сце́пы** вагон эләктергестәре **3.** тағылма; **сцеп двух се́ялок** ике сәскес тағылмаһы

**СЦЕПИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** тағыу, тоташтырыу, эләктереү; **сцепи́ть ваго́ны** вагондарҙы тағыу **2.** сатрашлау (*бармаҡтарҙы*); **сцепи́ть па́льцы** бармаҡтарҙы сатрашлау **3.** *разг.* ҡыҫыу (*теште, яңаҡты*); **сцепи́ть зу́бы** теште ҡыҫыу

**СЦЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *чем* и *без доп.* тоташыу, эләгеү, эләгешеү; **шестерни́ сцепи́лись** тешле тәгәрмәстәр эләкте **2.** *перен.* (*соединиться в одно целое*) тоташыу, тотоношоу, йәбешеү, берегеү **3.** *разг.* эләгешеү, бәрелешеү, талаша (һуғыша) башлау; **соба́ки сцепи́лись** эттәр талаша башланы

**СЦЕ́ПКА** *ж* **1.** *см.* **сцепи́ть — сцеплять 2.** *см.* **сцеп** 2, 3

**СЦЕПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **сцепи́ть — сцепля́ть 2.** элэктергес, тоташтырғыс; **сцепле́ния ваго́нов** вагондарҙы тоташтырғыс **3.** *см.* **сцепи́ться — сцепля́ться** 1, 2; **сцепле́ние моле́кул** молекулаларҙың тоташыуы

**СЦЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **сцепи́ть**

**СЦЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сцепи́ться 2.** *страд. от* **сцепля́ть**

**СЦЕПНО́Й,** -ая, -ое **1.** элэктергес, элэктерә (элэктереп ҡуйыла) торған; **сцепно́й механи́зм** элэктергес механизм; **сцепно́е устро́йство** элэктерә торған ҡулайлама **2.** *спец.* тартыу ...ы; **сцепна́я мо́щность тра́ктора** тракторҙың тартыу ҡеүәте

**СЦЕ́ПЩИК** *м* тағыусы, элэктереүсе (*вагондарҙы*)

**СЧА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **сча́лить**

**СЧА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **сча́литься 2.** *страд. от* **сча́ливать**

**СЧА́ЛИТЬ** *сов. что* бәйләп (тарттырып, элэктереп, тоташтырып) ҡуйыу; **сча́лить плоты́** һалдарҙы бәйләп ҡуйыу

**СЧА́ЛИТЬСЯ** *сов.* тоташтырып (элэктереп, тарттырып) бәйләнеү

**СЧАСТЛИ́ВЕЦ** *м* и **СЧАСТЛИ́ВИЦА** *ж* бәхетле (ырыҫлы, өлөшлө) кеше

**СЧАСТЛИ́ВЧИК** *м*; *разг. см.* **счастли́вец**

**СЧАСТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** бәхетле, ырыҫлы, ҡотло, мөбәрәк; **счастли́вое де́тство** бәхетле бала саҡ; **счастли́вый брак** бәхетле никах; **счастли́вый взгляд** бәхетле ҡараш; **счастли́вый ребёнок** ырыҫлы бала **2.** бәхетле, өлөшлө; **счастли́вый игро́к** өлөшлө уйынсы **3.** бәхетле, хәйерле; **счастли́вый исхо́д** хәйерле нәтижә ♦ **счастли́вый путь**; **счастли́вого пути́!** хәйерле юл!; юлың уң булһын!; **счастли́во остава́ться** һау булығыҙ, иҫән-һау тороғоҙ; **роди́ться под счастли́вой звездо́й** *см.* **звезда́**

**СЧА́СТЬЕ** *с* **1.** бәхет, ырыҫ, ҡот; **наро́дное сча́стье** халыҡ бәхете; **семе́йное сча́стье** ғаилә бәхете; **принести́ сча́стье** ҡот килтереү; **стреми́ться к сча́стью** бәхеткә ынтылыу; **теря́ть сча́стье** ырыҫ кәмеү **2.** ҡаҙаныш, далан; **сча́стье в игре́** уйындағы далан ♦ **к сча́стью**; **на сча́стье**; **по сча́стью** *в знач. вводн. сл.* бәхеткә ҡаршы, далаһына күрә

**СЧЕРТИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* күсереп һыҙыу, һыҙып күсермәһен алыу; **счерти́ть схе́му** схеманың күсермәһен алыу

**СЧЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **счерти́ть**

**СЧЕ́РЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **сче́рчивать**

**СЧЕСА́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* тарау, тарап алыу; **счеса́ть пух с козы́** кәзәнең дебетен тарап алыу **2.** тәрәшләү, тетеү, тарау; **счеса́ть лён** етен тәрәшләү

**СЧЕСА́ТЬСЯ** *сов.* таралыу, тарап алыныу; **счеса́лось мно́го пу́ху** бик күп дебет тарап алынды

**СЧЕСТЬ** *сов.* **1.** *что* (*определить количество чего-л.*) һанау, һанап (иҫәпләп) сығыу **2.** (*определить сумму чего-л., пользуясь какими-л. единицами измерения*) иҫәбенә сығыу, һанын (иҫәбен) билдәләү **3.** (*воспринять как-л.*) тип уйлау (иҫәпләү) ♦ **не счесть**; **не сочтёшь** *кого-чего* иҫәбенә (осона) сығырлыҡ түгел, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ, һанап бөтөргөһөҙ; **дни сочтены́** *см.* **день**

**СЧЕ́СТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* иҫәпләшеү, иҫәп-хисап яһау **2.** үҙ-ара мөнәсәбәтте асыҡлау, иҫәпләшеү, әйтешеү

**СЧЁТ** *м* **1.** *см.* **счита́ть** I 1—4; **поря́док счёта** һанау тәртибе; **счёт до ста** йөҙгә тиклем һанау; **обуче́ние счёту и письму́** һанарға һәм яҙырға өйрәтеү; **сби́ться со счёта** һанағанда яңылышыу **2.** иҫәп, һан; **зако́нчить матч со счётом 3:1** матчты 3:1 иҫәбе менән тамамлау; **рабо́тать в счёт сле́дующего го́да** киләһе йыл иҫәбенә эшләү **3.** счёт; **откры́ть счёт в ба́нке** *бухг.* банкыла счёт асыу; **счета́ по вкла́дам** *бухг.* вкладтар буйынса счёттар; **уплати́ть по счёту** счёт буйынса түләү **4.** *мн.* **счёты** иҫәптәр, иҫәп-хисап, мөнәсәбәттәр; **свести́ счёты** иҫәп-хисапты өҙөү; **ли́чные счёты** шәхси мөнәсәбәттәр ♦ **без счёту** иҫәпһеҙ-һанһыҙ, хисабы юҡ; **быть на хоро́шем (плохо́м) счету́** яҡшылар (насарҙар) иҫәбендә булыу; **в два счёта** *см.* **два**; **в коне́чном (после́днем) счёте** һуңғы (ахыр) сиктә; **в счёт** *чего* иҫәбенә, хисабына; **за счёт** *кого-чего* иҫәбенә, хисабына; **на счету́** иҫәптә; **на э́тот счёт** был яҡтан (йәһәттән); **не (идти́) в счёт** һаналмай, иҫәпкә инмәй; **поко́нчить счёты** араны өҙөү; **приня́ть на свой счёт** үҙеңә (үҙ иҫәбеңә) алыу; **теря́ть счёт** иҫәп-хисабын (иҫәбен) юғалтыу; **что за счёты** нимә иҫәпләшеп торорға; **кру́глый счёт**; **кру́глым счётом** *см.* **кру́глый**

**СЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое иҫәпләү ...ы, хисаплау ...ы, иҫәп-хисап ...ы; **счётная коми́ссия** иҫәпләү комиссияһы; **счётная маши́на** хисаплау машинаһы; **счётная лине́йка** иҫәпләү линейкаһы; **счётные докуме́нты** иҫәп-хисап документтары

**СЧЕТОВО́Д** *м* хисапсы; **счетово́д колхо́за** колхоз хисапсыһы

**СЧЕТОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое иҫәп-хисап ...ы, иҫәпләү ...ы; **счетово́дные кни́ги** иҫәп-хисап кенәгәләре

**СЧЕТОВО́ДСТВО** *с* хисапсылыҡ; **занима́ться счетово́дством** хисапсылыҡ менән шөғөлләнеү

**СЧЕТОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое хисапсы(лар) ...ы, хисапсылыҡ ...ы; **счетово́дческие ку́рсы** хисапсылар курсы

**СЧЁТЧИК** *м* **1.** иҫәпсе, хисапсы, иҫәпләүсе, хисаплаусы, иҫәп (хисап) алыусы; **счётчики по пе́реписи населе́ния** халыҡ иҫәбен алыусылар **2.** счётчик, иҫәпләгес, һанағыс; **счётчик электроэне́ргии** электр энергияһы счётчигы; **счётчик ско́рости** тиҙлек һанағыс

**СЧЁТЧИЦА** *ж см.* **счётчик** 1

**СЧЁТЫ** *мн.* счёт; **счита́ть на счётах** счётта һанау

**СЧИСЛЕ́НИЕ** *с*; *мат.* иҫәпләү, һанау; **десяти́чная систе́ма счисле́ния** унарлы иҫәпләү системаһы

**СЧИ́СТИТЬ** *сов. что* таҙартыу, әрсеү; **счи́стить снег с путе́й** юлдарҙы ҡарҙан таҙартыу; **счи́стить кожуру́ с апельси́на** әфлисун ҡабығын әрсеү

**СЧИ́СТИТЬСЯ** *сов.* сығып бөтөү, таҙарыу, әрселеү; **кра́ска счи́стилась** буяу сығып бөткән; **кожура́ счи́стилась** ҡабыҡ әрселде

**СЧИТА́ЛКА** *ж*; *разг.* һанағыс

**СЧИ́ТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **счита́ть** I; **2.** *прил.* һанаулы, хисаплы, иҫәпле; **счи́танные де́ньги** һанаулы аҡса; **счи́танные дни** хисаплы көндәр

**СЧИТА́ТЬ I** *несов. кого-что* **1.** һанау; **счита́ть до ста** йөҙгә тиклем һанау **2.** һанау, иҫәпләү, хисаплау; **счита́ть де́ньги** аҡса иҫәпләү; **счита́ть на счётах** счётта хисаплау **3.** иҫәпләү; **счита́ть в килогра́ммах** килограмдар менән иҫәпләү **4.** һанай (иҫәпләй) башлау, һанау; **два го́да, счита́я с о́сени** көҙҙән башлап һанағанда, ике йыл **5.** тип уйлау (иҫәпләү, һанау, табыу); **счита́ть дру́гом** дуҫ тип иҫәпләү; **счита́ть ли́шним** артыҡ тип һанау ♦ **не счита́я** иҫәпкә алмағанда; **не счита́ть де́нег** аҡсаны мул (иҫәпһеҙ) тотоноу; **счита́ть воро́н** ауыҙ асып тороу

**СЧИТА́ТЬ II** *сов. что* сағыштырып уҡыу (уҡып сығыу); **счита́ть вёрстку с ру́кописью** вёрстканы ҡулъяҙма менән сағыштырып уҡыу

**СЧИТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* иҫәпләшеү; **мы с ним ещё не счита́лись** беҙ уның менән иҫәпләшмәнек әле **2.** *с кем-чем* иҫәпләшеү, хисаплашыу, һанлау, һанға алыу (һуғыу); **счита́ться с мне́нием други́х** башҡаларҙың фекере менән иҫәпләшеү **3.** иҫәпләнеү, иҫәбендә булыу, һаналыу, тип уйланыу; **счита́ться хоро́шим инжене́ром** яҡшы инженерҙарҙан һаналыу **4.** иҫәпләнеү; **его́ де́ньги счита́лись миллио́нами** уның аҡсаһы миллиондар менән иҫәпләнә ине; **до дере́вни счита́лось де́сять киломе́тров** ауылға тиклем ун километр иҫәпләнә ине **5.** *страд. от* **счита́ть** I 2, 3, 5

**СЧИ́ТКА** *ж* **1.** *см.* **счита́ть** II — **счи́тывать**; **счи́тка маши́нописи с а́вторским те́кстом** машинкала баҫылғанды автор тексы менән сағыштырып уҡыу **2.** *театр.* пьесаны ролдәргә бүлеп уҡыу

**СЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **счита́ть** II

**СЧИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **счи́тывать**

**СЧИЩА́ТЬ** *несов. см.* **счи́стить**

**СЧИЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **счи́ститься** **2.** *страд. от* **счища́ть**

**СШИБА́ТЬ** *несов. см.* **сшиби́ть**

**СШИБИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** бәреп (һуғып) төшөрөү, (бәреп) йығыу; **сшиби́ть па́лкой** таяҡ менән бәреп йығыу **2.** (*столкнуть вместе*) бәрелдереү, бәрелештереү, һуғылдырыу; **сшиби́ть лба́ми** маңлайҙарын бәрелештереү ♦ **сшиби́ть спесь** *с кого* кикереген төшөрөү

**СШИБИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*столкнуться*) бәрелеү, һуғылыу, бәрелешеү; **ло́шади сши́блись** аттар бәрелеште **2.** (*сойтись в бою*) бәрелешеү, һуғышыу

**СШИВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ялғай (тегә) торған, тегеү ...ы; **сшива́льная маши́на** тегә торған машина

**СШИВА́ЛЬЩИК** *м* и **СШИВА́ЛЬЩИЦА** *ж* ялғаусы, ҡораусы; **сшива́льщица ме́ха** тиреләрҙе ҡораусы; **сшива́льщик фане́ры** фанер ялғаусы

**СШИВА́ТЬ** *несов. см.* **сшить** 1, 2

**СШИВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **сшива́ть**

**СШИ́ВКА** *ж*; *спец., разг.* **1.** *см.* **сшить** — **сшива́ть** **2.** ҡорап тегелгән урын, йөй

**СШИВНО́Й,** -ая, -ое ҡушып тегелгән, йөйлө; **сшивно́й рука́в** ҡушып тегелгән ең

**СШИТЬ** *сов. что* **1.** ҡушыу, ялғап (ҡушып) тегеү, ҡорау; **сшить куски́ мате́рии** ҡорама ҡорау; **сшить бе́личьи шку́рки** тейен тиреләрен ҡорау **2.** *спец.* сигәләү, ҡорау; **сшить листы́ железа** ҡалай сигәләү **3.** *см.* **шить** 1

**СЪ...** *приставка см.* **с...**

**СЪЕДА́ТЬ** *несов. см.* **съесть**

**СЪЕДА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **съеда́ть**

**СЪЕДЕ́НИЕ: (отда́ть, оста́вить, оста́ться) на съеде́ние** *кому-л.*: 1) ашарға (аҙыҡ итеп) биреү (ҡалдырыу); 2) *перен.* (*в полную власть кому-л.*) ҡулына, ҡарамағына (биреү, ҡалдырыу)

**СЪЕДО́БНЫЙ,** -ая, -ое ашай торған, ашарға яраҡлы, ашарлыҡ; **съедо́бная трава́** ашай торған үлән; **съедо́бный гриб** ашарға яраҡлы бәшмәк

**СЪЁЖИВАТЬ** *несов. см.* **съёжить**

**СЪЁЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **съёжиться** **2.** *страд. от* **съёживать**

**СЪЁЖИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** (*губы*) бөршәйтеү, йыйырыу; (*лицо, нос*) сирылдырыу, сырыштырыу, йыйырсыҡландырыу **2.** (*повести, пожать плечами*) йыйырыу **3.** (*сжать тело*) бөршәйтеү, ҡороштороу

**СЪЁЖИТЬСЯ** *сов.* **1.** йомарланыу, бөгәрләнеү, сырышыу; (*о коже*) сирышыу, бөрөшөү, йыйырсыҡланыу; (*о листьях*) бөрөшөү; **съёжиться от сти́рки** йыуғандан сырышыу **2.** (*стянуться — о губах*) бөршәйеү, йыйырылыу; (*о лице, носе*) сырышыу, йыйырсыҡланыу **3.** (*сжаться в комок*) бөршәйеү, ҡорошоу; **съёжиться от хо́лода** һыуыҡтан бөршәйеү

**СЪЕЗД** *м* **1.** *см.* **съезжа́ться** 2; **съезд госте́й** ҡунаҡтар йыйылыу **2.** съезд, ҡоролтай, йыйын; **съезд учителе́й** уҡытыусылар съезы **3.** төшә торған ер, төшөү юлы; **съезд к реке́** йылғаға төшөү юлы **4.** *см.* **съезжа́ть** 1—3

**СЪЕ́ЗДИТЬ** *сов.* барып ҡайтыу (килеү); **съе́здить к родны́м** туғандарға барып ҡайтыу

**СЪЕЗЖА́ТЬ** *несов. см.* **съе́хать**

**СЪЕЗЖА́ТЬСЯ** *несов. см.* **съе́хаться**



16 зак. 2.0007.06

**СЪЁМКА** *ж* **1.** *см.* **снять** — **снима́ть** 1, 5, 6, 10, 11; **съёмка плодо́в** емештәрҙе йыйып алыу; **нату́рная съёмка** натуранан төшөрөү; **съёмка фи́льма** фильм төшөрөү **2.** *геод.* төшөрөү, күсермә алыу (*планға, картаға*); **глазоме́рная съёмка** күҙ үлсәме менән төшөрөү

**СЪЁМНЫЙ,** -ая, -ое **1.** алынмалы, алмалы; **съёмный замо́к** алынмалы йоҙаҡ; **съёмный проте́з** алынмалы протез **2.** *с.-х.* йыйырға әҙер, өлгөргән, (өҙөргә) ярарлыҡ; **съёмные плоды́** өлгөргән емештәр

**СЪЁМОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *кино.* кино төшөрөү ...ы; **съёмочная гру́ппа** кино төшөрөү төркөмө **2.** *кино.* кино төшөрөү ...ы; **съёмочный аппара́т** кино төшөрөү аппараты **3.** *геод.* күсермә алыу ...ы, төшөрөү ...ы; **съёмочные рабо́ты** күсермә алыу эштәре

**СЪЁМЩИК** *м* и **СЪЁМЩИЦА** *ж* **1.** (ваҡытлыса) файҙаланыуға алыусы (алып тороусы); (*квартиры, комнаты*) фатирға инеүсе, кеше фатирында тороусы; **съёмщик да́чи** дачаны файҙаланыуға алып тороусы **2.** *геод.* төшөрөүсе, күсермә алыусы

**СЪЕСТНО́Й,** -ая, -ое **1.** аҙыҡ ...ы, ашамлыҡ ...ы, ризыҡ ...ы; **съестны́е запа́сы** аҙыҡ запасы **2.** *в знач. сущ.* **съестно́е** *с* аҙыҡ, ашамлыҡ, ризыҡ; **запасти́ съестно́е** аҙыҡ әҙерләү

**СЪЕСТЬ** *сов. кого-что* **1.** ашау, ашап бөтөрөү; **съесть кусо́к пирога́** бер киҫәк бәлеш ашау **2.** ашау, киҫеү, ҡырҡыу; **моль съе́ла сукно́** буҫтауҙы көйә ашаған **3.** *разг.* (*искусать — о насекомых*) тешләү, тешләп бөтөрөү **4.** (*о едких, ядовитых веществах, ржавчине*) ашау, ҡырҡыу, уйыу; **ржа́вчина съе́ла кро́влю** ҡыйыҡ ябыуын тут ашаған **5.** *перен., разг.* (*извести придирками, бранью*) ҡыйырһытыу, бәйләнеү, игәү **6.** *разг.* ғазаплау, интектереү, йөҙәтеү; **тоска́ съеда́ет** һағыш ғазаплай ♦ **соба́ку съел** *см.* **соба́ка**

**СЪЕ́ХАТЬ** *сов.* **1.** төшөү, түбән төшөү, шыуып төшөү; **съе́хать на са́нках с горы́** тауҙан санала шыуып төшөү **2.** төшөү, боролоу; **маши́на съе́хала с доро́ги** машина юлдан төштө **3.** *разг.* китеү, күсеп китеү, сығыу, сығып китеү; **съе́хать с кварти́ры** фатирҙан күсеү **4.** *разг.* төшөү, ҡыйшайыу, ҡырынайыу; **ша́пка съе́хала** бүрек ҡырынайған **5.** *на что*; *перен., прост.* төшөү; **съе́хать со ста рубле́й на во́семьдесят** йөҙ һумдан һикһәнгә төшөү

**СЪЕ́ХАТЬСЯ** *сов.* **1.** (*едучи, встретиться где-л. с кем-л.*) осрашыу; **съе́хаться на пути́** юлда осрашыу **2.** килеү, йыйылыу; **го́сти съе́хались** ҡунаҡтар йыйылды

**СЪЕХИ́ДНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* мыҫҡыллап һүҙ әйтеү

**СЪЯЗВИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* төрттөрөү, әсе көлөү

**СЫ́ВОРОТКА** *ж* **1.** эремсек һыуы **2.** һүл, сыворотка; **сы́воротка кро́ви** ҡан һүле; **противодифтери́йная сы́воротка** дифтерияға ҡаршы сыворотка

**СЫ́ВОРОТОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** эремсек һыуы; **сы́вороточное произво́дство** эремсек һыуы етештереү **2.** сыворотка ...ы, сыворотка менән; **сы́вороточное лече́ние** сыворотка менән дауалау

**СЫ́ГРАННОСТЬ** *ж* ойошҡанлыҡ, уйынға берҙәмлек; **сы́гранность футбо́льной кома́нды** футбол командаһының ойошҡанлығы

**СЫ́ГРАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **сыгра́ть** **2.** *прил.* ойошҡан, берҙәм уйнаған; **сы́гранная хокке́йная кома́нда** берҙәм уйнаған хоккей командаһы

**СЫГРА́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **игра́ть**; **сыгра́ть в ша́хматы** шахмат уйнап алыу; **сыгра́ть на скри́пке** скрипкала уйнау **2.** *сов.* башҡарыу, уйнау; **сыгра́ть роль Салава́та Юла́ева** Салауат Юлаев ролен башҡарыу ♦ **сыгра́ть шу́тку** уҫал шаяртыу, насарлыҡ эшләү; **сыгра́ть в я́щик** *груб.-прост.* аяҡты һуҙыу, үлеү

**СЫГРА́ТЬСЯ** *сов.* бергә уйнарға оҫтарыу, бергә уйнарға күнегеү; **музыка́нты сыгра́лись** музыканттар бергә уйнарға оҫтарған

**СЫГРО́ВКА** *ж* оркестр репетицияһы; **собра́ться на сыгро́вку** оркестр репетицияһына йыйылыу

**СЫ́ГРЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **сыгра́ться**

**СЫ́ЗНОВА** *нареч.*; *разг.* яңынан, өр-яңынан, иң баштан, ҡайтанан; **нача́ть сы́знова** өр-яңынан башлау

**СЫН** *м* **1.** ул; **ста́рший сын** оло ул; **сын своего́ наро́да** *высок.* үҙ халҡының улы **2.** *мн.* **сыны́** *чего*; *высок.* улдар, уландар; **отва́жные сыны́ Ро́дины** Ватандың ғәййәр улдары

**СЫНИ́ШКА** *м*; *уменьш.-ласк. от* **сын** 1

**СЫНО́ВИЙ,** -ья, -ье *см.* **сыно́вний**

**СЫНО́ВНИЙ,** -яя, -ее уллыҡ, балалыҡ ...ы; **сыно́вний долг** уллыҡ бурысы; **сыно́вняя любо́вь** балалыҡ һөйөүе

**СЫНО́К** *м*; *разг.* **1.** *уменьш.-ласк. от* **сын** 1; **2.** (*в обращении*) улым ♦ **ма́менькин сыно́к** *см.* **ма́менькин**

**СЫ́ПАТЬ** *несов.* **1.** *что* һалыу, тултырыу; **сы́пать зерно́ в мешо́к** ашлыҡты тоҡҡа тултырыу; **сы́пать соль в суп** ашҡа тоҙ һалыу **2.** *что, чем* һибеү, сәсеү; **сы́пать песо́к** ҡом һибеү **3.** (*об осадках*) һибәләү, ҡойоу, яуыу; **дождь сы́плет** ямғыр һибәләй **4.** *что*; *перен., разг.* һиптереү, яуҙырыу, яуыу; **сы́пать из пулемёта** пулеметтан һиптереү; **сы́пать остро́тами** тапҡыр һүҙҙәр яуҙырыу

**СЫ́ПАТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡойолоу, түгелеү, шаурап төшөү; **зерно́ сы́плется** ашлыҡ ҡойола; **с горы́ сы́плются ка́мни** тауҙан таштар шаурап төшә **2.** һибелеү, таралыу, сәсрәү; **и́скры сы́пались из-под подко́в** дағаларҙан осҡондар сәсрәй **3.** *перен.* яуыу; **снаря́ды сы́плются** снарядтар яуа; **предложе́ния сы́пались со всех сторо́н** төрлө яҡтан тәҡдимдәр яуҙы **4.** *разг.* (*о ткани*) һүрелеү **5.** *страд. от* **сы́пать** 1, 2 ♦ **песо́к сы́плется** бик ҡарт, ҡартайып хәлдән тайған, ҡомо ҡойола

**СЫПЕ́Ц** *м*; *с.-х.* тиреҫ онтағы

**СЫ́ПКИЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **сыпу́чий**

**СЫПНО́Й: сыпно́й тиф** сабыртмалы (тимгелле) тиф

**СЫПНОТИФО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сабыртмалы (тимгелле) тиф ...ы; **сыпнотифо́зная эпиде́мия** сабыртмалы тиф эпидемияһы **2.** *в знач. сущ.* **сыпнотифо́зный** *м* и **сыпнотифо́зная** *ж* сабыртмалы (тимгелле) тиф менән ауырыусы, сабыртмалы (тимгелле) тифле

**СЫПНЯ́К** *м*; *разг. см.* **сыпно́й тиф**

**СЫПУ́ЧЕСТЬ** *ж* ҡойолоусанлыҡ, һибелеүсәнлек, ярмалылыҡ, ыуалыусанлыҡ; **сыпу́честь по́чвы** тупраҡтың ярмалылығы; **сыпу́честь зерна́** ашлыҡтың ҡойолоусанлығы

**СЫПУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** бөртөклө, ярмалы, сәсмә; **сыпу́чая по́чва** ярмалы тупраҡ; **сыпу́чие тела́** бөртөклө есемдәр **2.** (тиҙ) ҡойолоусан, һибелеүсән, сәселеүсән, түгелеүсән; **сыпу́чий мак** тиҙ ҡойолоусан мәк

**СЫПЬ** *ж* **1.** әҫпе, сабыртма, һипкел, тимгел; **аллерги́ческая сыпь** аллергия сабыртмаһы; **появле́ние сы́пи** әҫпе ҡалҡыу

**СЫР** *м* сыр; **голла́ндский сыр** голланд сыры; **голо́вка сы́ру** бер баш сыр ♦ **как сыр в ма́сле ката́ться** бал да май эсендә йөҙөү, май эсендәге бөйөр һымаҡ йәшәү

**СЫРЕ́ТЬ** *несов.* дымланыу, еүешләнеү, дым тартыу; **сте́ны сыре́ют** стеналар еүешләнә

**СЫРЕ́Ц** *м* сей (эшкәртелмәгән) нәмә, сей; **кирпи́ч-сыре́ц** сей кирбес; **шёлк-сыре́ц** эшкәртелмәгән ебәк

**СЫРКО́ВЫЙ: сырко́вая ма́сса** (иҙелгән) татлы эремсек

**СЫ́РНИК** *м*; *кул.* эремсек ҡабартмаһы

**СЫ́РНЫЙ,** -ая, -ое сыр ...ы; **сы́рный заво́д** сыр заводы

**СЫРОВА́Р** *м* сыр ҡайнатыусы

**СЫРОВАРЕ́НИЕ** с *см.* **сыроде́лие**

**СЫРОВА́РЕННЫЙ,** -ая, -ое сыр ҡайнатыу (яһау) ...ы; **сырова́ренная промы́шленность** сыр яһау сәнәғәте

**СЫРОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **сырова́ренный**

**СЫРОДЕ́Л** *м* сыр яһаусы (ҡайнатыусы)

**СЫРОДЕ́ЛИЕ** *с* сыр ҡайнатыу, сыр яһау

**СЫРОДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сыр ...ы, сыр яһау ...ы; **сыроде́льный заво́д** сыр яһау заводы

**СЫРОЕ́ЖКА** *ж* һарыҡ бәшмәге

**СЫРО́Й,** -ая, -ое **1.** еүеш, дымлы, сей; **сыро́е бельё** еүеш кер; **сыры́е дрова́** сей утын **2.** сей, бешмәгән, ҡайнамаған, сейле-бешле; **сыро́е мя́со** бешмәгән ит; **пить сыру́ю во́ду** ҡайнамаған һыу эсеү; **сыро́й хлеб** сейле-бешле икмәк **3.** *прям.*, *перен.* сей, эшкәртелмәгән; **сыра́я ко́жа** сей күн; **сыро́й вариа́нт расска́за** хикәйәнең эшкәртелмәгән варианты

**СЫРО́К** *м* татлы эремсек

**СЫРОМЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡоба, иләнмәгән, эшкәртелмәгән, ҡайыш; **сыромя́тные ко́жи** ҡоба күндәр; **сыромя́тные овчи́ны** иләнмәгән һарыҡ тиреләре; **сыромя́тный по́яс** ҡайыш билбау; **сыромя́тные сапоги́** ҡоба итек **2.** ҡоба ...ы, ҡайыш ...ы; **сыромя́тный про́мысел** ҡоба эшләү кәсебе; **сыромя́тный цех** ҡайыш цехы

**СЫРОМЯ́ТЬ** *ж* ҡоба тире, ҡоба күн, ҡайыш, йолон

**СЫ́РОСТЬ** *ж* дым, дымлылыҡ, еүешлек; **сы́рость земли́** ерҙең еүешлеге; **вече́рняя сы́рость** киске дымлылыҡ

**СЫРЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое эшкәртелмәгән, сей; **сырцо́вый шёлк** эшкәртелмәгән ебәк; **сырцо́вый кирпи́ч** сей кирбес

**СЫРЬЁ** *с собир.* сеймал, сырье (*сей, эшкәртелмәгән нәмә*); **исто́чник сырья́** сеймал сығанағы

**СЫРЬЕВО́Й,** -ая, -ое сеймал ...ы, сырьё ...ы; **сырьевы́е ресу́рсы** сеймал сығанаҡтары; **сырьевы́е бога́тства** сеймал байлыҡтары

**СЫСК** *м* **1.** *уст. см.* **сыска́ть 2.** (енәйәтселәрҙе) эҙләү, эҙәрләү, эҙәрлекләү; **занима́ться сы́ском** эҙәрләү менән шөғөлләнеү

**СЫСКА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* табыу, эҙләп табыу; **нигде́ его́ не сы́щешь** уны бер ерҙә лә таба алмаҫһың ♦ **днём с огнём не сыска́ть** көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә таба алмаҫһың

**СЫСКА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* табылыу; **пропа́вшие кни́ги сыска́лись** юғалған китаптар табылды

**СЫСКНО́Й,** -ая, -ое эҙләү ...ы, эҙәрләү ...ы; **сыскна́я поли́ция** эҙләү полицияһы; **сыскно́е отделе́ние** эҙәрләү бүлеге

**СЫ́ТНЫЙ,** -ая, -ое туҡлыҡлы, һыйлы; **сы́тный обе́д** туҡлыҡлы төшкө аш; **сы́тная жизнь** һыйлы тормош

**СЫ́ТОСТЬ** *ж* туҡлыҡ, туҡ булыу

**СЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** туҡ; **сы́тый ребёнок** туҡ бала **2.** *разг.* (*упитанный*) һимеҙ, көр; **сы́тый скот** көр мал **3.** *перен.*, *разг.* мул, бай, туҡ; **сы́тая жизнь** мул тормош; **сы́тые лю́ди** бай кешеләр **4.** *разг.* туҡлыҡлы, һыйлы; **сы́тый у́жин** һыйлы киске аш ♦ **сыт по го́рло** туйған, ғарҡ булған

**СЫЧ** *м* һупайҙы ♦ **сычо́м (как сыч) гляде́ть (смотре́ть, сиде́ть)** ҡараңғы сырай менән ҡарау, сырай һытыу

**СЫ́ЧУГ** *м* күҙләнсек, таҙ ҡарын

**СЫЧУ́ЖИНА** *ж* эреткес (*таҙ ҡарын һуты ферменты*)

**СЫЧУ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое күҙләнсек ...ы, таҙ ҡарын ...ы; **сычу́жная вы́тяжка** күҙләнсек һығынтыһы

**СЫ́ЩИК** *м* шымсы

**СЭКОНО́МИТЬ** *сов. см.* **эконо́мить** 1

**СЭР** *м* сэр (*Англияла, АҠШ-та ирҙәргә өндәшеү һүҙе һәм титул*)

**СЭСЭ́Н** *м*; *обл.* (*импровизатор, сказитель*) сәсән

**СЮДА́** *нареч.* бында, был яҡҡа; **иди сюда́** кил бында

**СЮЖЕ́Т** *м* сюжет; **разви́тие сюже́та** сюжет үҫеше; **сюже́т для расска́за** хикәйә өсөн сюжет

**СЮЖЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сюжет ...ы; **сюже́тная ли́ния рома́на** романдың сюжет һыҙығы **2.** (*имеющий сюжет*) сюжетлы; **сюже́тный фильм** сюжетлы фильм

**СЮЗЕРЕ́Н** *м* сюзерен (**1.** *тар. эре феодал* **2.** *юр. икенсе бер дәүләтте үҙ бойондороғонда тотҡан дәүләт*)

**СЮЗЕРЕНИТЕ́Т** *м*; *ист.* сюзеренлыҡ

**СЮЗЕРЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое сюзерен ...ы, сюзеренлыҡ ...ы; **сюзере́нные права́** сюзеренлыҡ хоҡуҡтары

**СЮИ́ТА** *ж*; *в разн. знач.* сюита; **бале́тная сюи́та** балет сюитаһы; **симфони́ческая сюи́та** симфоник сюита

**СЮИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое сюита ...ы

**СЮРПРИ́З** *м* **1.** сюрприз, көтөлмәгән бүләк; **сюрпри́з ко дню рожде́ния** тыуған көнгә көтөлмәгән бүләк **2.** (*неожиданность*) көтөлмәгән хәл, көтөлмәгәнлек, яңылыҡ

**СЮРТУ́К** *м* сюртук (*ирҙәр кейеме*)

**СЮРТУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое сюртук ...ы; **сюрту́чные пу́говицы** сюртук төймәләре

**СЮСЮ́КАТЬ** *несов.*; *разг.* сүселдәү, сүселдәп һөйләшеү; **сюсю́кать с ребёнком** бала менән сүселдәп һөйләшеү

**СЯЖКИ́** и **СЯ́ЖКИ** *мн.*; *зоол.* мыйыҡтар (*бөжәктәрҙә*)

**СЯК: и та́к и ся́к**; **то та́к, то ся́к**; **так-ся́к** *см.* **так**

**СЯКО́Й,** -ая, -ое *мест. см.* **тако́й-сяко́й**

**СЯМ: та́м и ся́м**; **там-ся́м**; **то та́м, то ся́м** *см.* **там**

# Т

**ТА** *ж мест. см.* **тот**

**ТАБА́К** *м*; *в разн. знач.* тәмәке; **листово́й таба́к** япраҡ тәмәке; **души́стый таба́к** *бот.* хуш еҫле тәмәке; **ню́хательный таба́к** еҫкәй торған тәмәке; **выра́щивать таба́к** тәмәке үҫтереү; **кури́ть таба́к** тәмәке тартыу ♦ **де́ло таба́к!** *прост.* эш мөшкөл!, эше бөткән!

**ТАБАКЕ́РКА** *ж* тәмәке һауыты

**ТАБАКОВО́Д** *м* тәмәке үҫтереүсе, тәмәке буйынса белгес

**ТАБАКОВО́ДСТВО** *с* тәмәкеселек (*тәмәке үҫтереү эше*)

**ТАБАКОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тәмәкеселек ...ы, тәмәке үҫтереү менән шөғөлләнгән; **табаково́дческий совхо́з** тәмәке үҫтереү менән шөғөлләнгән совхоз

**ТАБА́НИТЬ** *несов.*; *мор.* кирегә ишеү (*кәмәлә йөрөгәндә*)

**ТАБА́ЧНИК** *м*; *прост.* тәмәкесе (*тәмәке тартҡан йәки еҫкәгән кеше*)

**ТАБА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәмәке ...ы; **таба́чная фа́брика** тәмәке фабрикаһы; **таба́чный дым** тәмәке төтөнө **2.** (*о цвете*) тәмәке төҫлө, көрәнһыу йәшел

**ТА́БЕЛЬ** *м* и *уст.* **та́бель** *ж* табель (**1.** *өлгөрөш ведомосы* **2.** *эшкә йөрөүҙе иҫәпкә алыу таблицаһы*) ♦ **Та́бель о ра́нгах** *ист.* Рангылар исемлеге (*Рәсәйҙә Пётр I тарафынан индерелгән хәрби, граждандар һ.б. дәрәжәләрҙең баҫҡыслы системаһы*)

**ТА́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое табель ...ы; **та́бельная доска́** табель таҡтаһы; **та́бельная систе́ма** табель системаһы

**ТА́БЕЛЬЩИК** *м* и **ТА́БЕЛЬЩИЦА** *ж* табелсе

**ТАБЛЕ́ТКА** *ж* таблетка; **табле́тка от головно́й бо́ли** баш ауыртҡандан таблетка; **принима́ть табле́тки** таблетка йотоу (ҡабул итеү)

**ТАБЛЕ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое таблеткалы, һиҙәпле; **табле́точное лека́рство** һиҙәпле дарыу

**ТАБЛИ́ЦА** *ж* таблица, йәҙүәл; **табли́ца умноже́ния** ҡабатлау таблицаһы; **табли́ца вы́игрышей** отош таблицаһы

**ТАБЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое таблица ...ы, йәҙүәл ...ы; **табли́чные све́дения** таблица мәғлүмәттәре

**ТАБЛО́** *с нескл.*; *спец.* табло; **светово́е табло́** яҡтыртыла торған табло

**ТА́БОР** *м* табор; **цыга́нский та́бор** сиғандар таборы

**ТА́БОРНЫЙ,** -ая, -ое табор ...ы; **та́борные пе́сни** табор йырҙары

**ТАБУ́** *с нескл.* **1.** табу (*тыйылған нәмә, эш йәки һүҙ*); **наложи́ть табу́** табу һалыу **2.** *перен.* (*что-л. запретное*) тыйыу

**ТАБУ́Н** *м*; *прям.*, *перен.* өйөр, көтөү; **табу́н лошаде́й** йылҡы өйөрө; **табу́н мальчи́шек** малайҙар өйөрө

**ТАБУ́ННЫЙ,** -ая, -ое өйөр ...ы, көтөү ...ы; **табу́нный скот** өйөр малы; **табу́нное конево́дство** өйөр йылҡысылығы

**ТАБУ́НЩИК** *м* йылҡысы, йылҡы көтөүсеһе

**ТАБУРЕ́Т** *м* и **ТАБУРЕ́ТКА** *ж* табуретка (*артһыҙ ултырғыс*); **сесть на табуре́тку** табуретҡаға ултырыу

**ТАВЕ́РНА** *ж* таверна (*бәләкәй трактир*)

**ТА́ВОЛГА** *ж* еркәүек

**ТАВРЁНЫЙ,** -ая, -ое тамғалы; **таврёный скот** тамғалы мал

**ТАВРИ́ТЬ** *несов. кого-что*; *спец.* тамғалау, тамға һалыу; **таври́ть скот** малға тамға һалыу

**ТАВРО́** *с* тамға; **вы́жечь тавро́** тамға баҫыу

**ТАВРО́ВЫЙ,** -ая, -ое тамға ...ы; **тавро́вый знак** тамға билдәһе ♦ **тавро́вое желе́зо** *спец.* тамға тимере

**ТАВТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лит.* тавтологик; **тавтологи́ческая оши́бка** тавтологик хата

**ТАВТОЛО́ГИЯ** *ж*; *лит.* тавтология (*бер үк төшөнсәне икенсе һүҙҙәр менән ҡабатлау*)

**ТАГА́Н** *м* таған, өс таған, өсаяҡ; **поста́вить тага́н** өс таған ҡуйыу

**ТАГАНО́К** *м* бәләкәй таған

**ТАДЖИ́КИ** *мн.* тажиктар, тажик халҡы // *ед.* **таджи́к** *м* тажик ир-аты; **таджи́чка** *ж* тажик ҡатын-ҡыҙы

**ТАДЖИ́КСКИЙ,** -ая, -ое тажик ...ы; **таджи́кский язы́к** тажик теле

**ТАЁЖНИК** *м* тайга кешеһе, тайгала йәшәүсе

**ТАЁЖНЫЙ,** -ая, -ое тайга ...ы, тайгалағы; **таёжный лес** тайга урманы; **таёжный пожа́р** тайгалағы янғын

**ТАЗ I** *м* тас; **ме́дный таз** баҡыр тас

**ТАЗ II** *м*; *анат.* янбаш, таз һөйәге

**ТАЗОБЕ́ДРЕННЫЙ,** -ая, -ое *анат.* янбаш-бот ...ы; **тазобе́дренный суста́в** янбаш-бот быуыны

**ТА́ЗОВЫЙ I,** -ая, -ое тас ...ы

**ТА́ЗОВЫЙ II,** -ая, -ое *анат.* янбаш ...ы; **та́зовая кость** янбаш һөйәге

**ТА́И** *мн.* (*группа народов в странах Индокитая, Южном Китае и Северо-Восточной Индии*) таи халҡы, таиҙар

**ТАЙНСТВЕННОСТЬ** *ж* йәшеренлек, серлелек

**ТАЙНСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** серле, билдәһеҙ; **таи́нственное явле́ние приро́ды** тәбиғәттең билдәһеҙ күренеше; **таи́нственный шо́рох** серле ҡыштырлау **2.** (*скрывающий что-л.*) серле; **с таи́нственным ви́дом** серле төҫ менән

**ТА́ИНСТВО** *с* **1.** *книжн. см.* **та́йна 2.** (*религиозный обряд*) серле (тылсымлы) йола, сер (тылсым) көсө

**ТАИ́ТЬ** *несов. что* **1.** (*скрывать, держать в тайне*) һаҡлау, сер итеп тотоу, йәшереү; **таи́ть зло́бу** асыу һаҡлау **2.** (*заключать в себе*) һаҡлау, тотоу; **земля́ таи́т в себе́ мно́го бога́тств** ер үҙендә күп байлыҡ һаҡлай ♦ **не́чего греха́ таи́ть** йәшерен-боҫороно юҡ

**ТАИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*прятаться*) йәшеренеп ятыу **2.** (*заключаться в ком-чём-л., не проявляясь*) ятыу, һаҡланыу **3.** *разг.* (*не высказывать, скрывать что-л.*) йәшереү, эсеңдә һаҡлау; **говори́ть не тая́сь** йәшермәй әйтеү

**ТАЙГА́** *ж* тайга; **сиби́рская тайга́** Себер тайгаһы; **жить в тайге́** тайгала йәшәү

**ТАЙКО́М** *нареч.* йәшерен рәүештә, йәшерен генә, йәшенеп-боҫоп ҡына, шыпырт ҡына; **пробира́ться тайко́м** йәшерен генә үтеү; **разгова́ривать тайко́м** шыпырт ҡына һөйләшеү; **приходи́ть тайко́м** йәшенеп-боҫоп ҡына килеү

**ТАЙМ** *м*; *спорт.* тайм (*уйындың бер өлөшө*); **переры́в ме́жду та́ймами** таймдар араһындағы тәнәфес

**ТАЙМЕ́НЬ** *м* ҡыҙылбалыҡ

**ТА́ЙНА** *ж*; *в разн. знач.* сер; **вое́нная та́йна** хәрби сер; **та́йна перепи́ски** хатлашыу сере; **заве́тная та́йна** йөрәк сере; **разгласи́ть та́йну** серҙе асыу (сисеү); **держа́ть в та́йне** сер итеү; **выдава́ть та́йну** серҙе фаш итеү

**ТАЙНИ́К** *м* **1.** йәшерен урын **2.** *бот.* серүлән

**ТА́ЙНО** *нареч.* йәшерен, аҫтыртын; **де́лать та́йно** аҫтыртын эшләү

**ТА́ЙНОПИСЬ** *ж* йәшерен яҙыу, шартлы яҙыу

**ТА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* йәшерен, аҫтыртын; **та́йная мечта́** йәшерен хыял; **та́йное голосова́ние** йәшерен тауыш биреү; **та́йные вы́боры** йәшерен һайлау; **та́йные дела́** йәшерен эштәр; **та́йный враг** аҫтыртын дошман

**ТАЙФУ́Н** *м* тайфун, диңгеҙ ҡойоно

**ТАК** *нареч., частица* и *союз* **1.** *нареч.* (*таким образом*) шулай, ана шулай; **и́менно так** тап ана шулай; **сде́лай так** ана шулай эшлә **2.** *нареч.* (*до такой степени, настолько*) шул тиклем; **так мно́го я́год** еләк шул тиклем күп **3.** *нареч.* (*без последствий*) шулай ғына, шул көйөнсә генә; **э́то так не пройдёт** был эш шулай ғына үтмәҫ **4.** *нареч.* (*без особого намерения*) тик, былай ғына, һүҙ ыңғайында; **сказа́ть про́сто так** былай ғына әйтеү **5.** *нареч.* (*подобно этому*) шулай, улай, шулай ул; **нехорошо́ так говори́ть** улай әйтеү ярамай **6.** *частица огранич.* (*для указания на приблизительное количество, время и т.п.*) самаһы, самаһында; **лет так шести́десяти** йәше шул алтмыштар самаһы **7.** *частица* (*например, к примеру*) мәҫәлән, әйтәйек; **днём жа́рко: так, температу́ра дохо́дит до сорока́ гра́дусов** көндөҙ эҫе: мәҫәлән, эҫелек ҡырҡ градусҡа тиклем етә **8.** *частица* (*следовательно, значит*) тимәк, шулай итеп; **так ты мне не ве́ришь?** тимәк, һин миңә ышанмайһың? **9.** *нареч.* (*тогда, в таком случае*) инде, ул саҡта (ваҡытта), шулай (улай) булғас; **рабо́ту доде́лала, так мо́жно отдыха́ть** эшемде эшләп бөттөм, инде ял итеп була **10.** *союз* (*вследствие этого, потому*) шуға күрә, инде; **сего́дня хо́лодно, так на́до оде́ться потепле́е** бөгөн һыуыҡ, шуға күрә йылыраҡ кейенергә кәрәк **11.** *союз* (*однако*) ләкин, әммә; **ведь я говори́л, так ты не послу́шал** мин әйттем бит, ләкин һин ҡолаҡ һалманың ♦ **и так да́лее** *см.* **да́лее**; **как бы не так** *см.* **как**; **как же так** *разг.* бына һиңә тағы, бына һиңә кәрәк булһа; **давно́ бы так** *см.* **давно́**; **(и) та́к и ся́к**; **(и) та́к и э́так** төрлөсә, тегеләй ҙә былай ҙа, улай ҙа былай ҙа; **то та́к, то ся́к**; **то та́к, то э́так** әле улай, әле былай; **так-ся́к** *в знач. сказ.* ярай инде шулай, уртаса, бер хәл (сама); **не так ли?** *разг.* шулай түгелме ни?, улай түгелме ни?; **так и знай** *разг.* белеп тор; **так и на́до** *разг.* шулай кәрәк тә; **так и быть** *см.* **быть**; **так или ина́че** *см.* **ина́че**; **так сказа́ть** әйтмешләй; **так что** шуға күрә; **так как** сөнки; **та́к-то (оно́) так** шулайын шулай ҙа ул; **раз так** шулай (улай) икән (булғас), улай булһа

**ТАКЕЛА́Ж** *м* такелаж (**1.** *диңг. арҡан-бауҙар* **2.** *махс. йөктө күтәреү һәм бер урындан икенсе урынға күсереү өсөн ҡулланыла торған ҡоралдар*)

**ТАКЕЛА́ЖНИК** *м* такелажсы

**ТАКЕЛА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *мор., спец.* такелаж ...ы; **такела́жные рабо́ты** такелаж эштәре

**ТА́КЖЕ** *нареч.* и *союз* **1.** *нареч.* (*тоже, равным образом*) шулай уҡ, да/дә; **она́ та́кже пришла́ на собра́ние** ул да йыйылышҡа килде **2.** *союз присоед.* (*в сочет. с союзами "а", "и", "но"*) һәм ... да/дә; шулай уҡ ... да/дә; да/дә, ... да/дә; **он, а та́кже я вы́ступили на конфере́нции** ул да, мин дә конференцияла сығыш яһаныҡ

**ТАКИ́** и **-ТАКИ** *частица; разг.* барыбер, шуға ҡарамаҫтан, шулай ҙа; **она́ таки́ уе́хала** ул барыбер китте; **он пришёл-таки** ул барыбер килгән

**ТАКО́В,** -а, -о *мест. в знач. сказ.* (бына) шундай; **таковы́ на́ши пла́ны** беҙҙең пландар бына шундай ♦ **(и) был тако́в** *разг.* юҡ булды, күҙҙән юғалды

**ТАКОВО́Й,** -ая, -ое *мест.* **1.** шундай, шулай, ундай, бындай **2.** *книжн.* ул, улар, был, ошо, шул; **е́сли полу́чен прика́з, то таково́й ну́жно выполня́ть** приказ алынған икән, уны үтәргә кәрәк ♦ **как таково́й** үҙе, үҙенән-үҙе

**ТАКО́Й,** -ая, -ое *мест.* **1.** (*как отвлечённое обозначение качества, свойства, указываемого в предшествующей или последующей речи*) ошондай, шундай, бындай; **он и действи́тельно был тако́й** ул ысынлап та шундай ине **2.** (*именно*) бындай, ошондай, ундай **3.** (*для усиления оценки, свойства, качества*) шундай, шул тиклем; **она́ така́я краси́вая** ул шундай сибәр **4.** *в знач. сущ.* **тако́е** *с* шундай нәмә, ундайҙар; **тако́е уви́деть** шундай нәмә күреү ♦ **в тако́м слу́чае** улай булғас, улайһа; **таки́м о́бразом** *см.* **о́браз** I; **до тако́й сте́пени** шул тиклем (саҡлы, дәрәжәлә); **что тако́е?** *кто-что* был нимә?, кем ул?, ул үҙе кем?; **что же тут тако́го?** бында иҫ китерлек нимә бар һуң?

**ТАКО́Й-СЯКО́Й,** -ая-сякая, -ое-сякое *мест.; разг.* фәлән-төгән, тегендәй-быңдай, фәлән-фәсмәтән

**ТАКО́Й-ТО,** -ая-то, -ое-то *мест.* фәлән, фәлән-фәлән; **в тако́е-то вре́мя** фәлән ваҡыт; **тако́й-то челове́к** фәлән кеше

**ТА́КСА I** *ж* (*расценка*) такса (*әйбергә алдан ҡуйылған хаҡ*); **плати́ть по та́ксе** такса буйынса түләү; **почто́вая та́кса** почта таксаһы

**ТА́КСА II** *ж* такса (*эт токомо*)

**ТАКСА́ТОР** *м* таксатор (**1.** *такса ҡуйыусы, баһа билдәләүсе* **2.** *таксация белгесе*)

**ТАКСА́ЦИЯ** *ж* такса ҡуйыу, таксалау (**1.** *такса билдәләү, баһа ҡуйыу* **2.** *махс. урманда ағастар иҫәбен алыу* **3.** *а.х. уңыш иҫәбен билдәләү*); **такса́ция това́ра** *спец.* тауарҙы таксалау

**ТАКСИ́** *с нескл.* такси; **грузово́е такси́** йөк таксийы; **взять такси́** такси алыу; **прие́хать на такси́** таксиҙа килеү

**ТАКСИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что; спец.* такса ҡуйыу, баһа билдәләү

**ТАКСИРО́ВЩИК** *м* такса ҡуйыусы, баһа билдәләүсе

**ТАКСИ́СТ** *м; разг.* такси йөрөтөүсе, таксист

**ТА́КСОВЫЙ,** -ая, -ое такса ...ы; **та́ксовая коми́ссия** такса комиссияһы

**ТАКСО́МЕТР** *м* таксометр (*таксиҙа үткән юл өсөн күпме хаҡ түләргә кәрәклекте күрһәтеүсе иҫәпләгес*)

**ТАКСОМОТО́Р** *м* таксомотор

**ТАКСОМОТО́РНЫЙ,** -ая, -ое таксомотор(ҙар) ...ы; **таксомото́рный парк** таксомоторҙар паркы

**ТАКСОНО́МИЯ** *ж* таксономия

**ТАКСОПА́РК** *м* таксопарк (*таксиҙар паркы*); **диспе́тчер таксопа́рка** таксопарк диспетчеры

**ТАКСОФО́Н** *м* таксофон (*киң ҡулланыусылар өсөн металл аҡса һалып йәки жетон, карточка ярҙамында һөйләшә торған телефон-автомат*)

**ТАК-СЯ́К** *в знач. сказ. см.* **так**

**ТАКТ I** *м* такт (**1.** *муз. тауыштарҙың билдәле бер үлсәм менән әйтелеше* **2.** *һөйл. бер тигеҙ хәрәкәттең һәр өлөшө* **3.** *физ., тех. бер йүнәлештәге хәрәкәт*)

**ТАКТ II** *м* ип, әҙәп, такт; **держа́ть себя́ с та́ктом** үҙеңде ипле тотоу; **чу́вство та́кта** әҙәплелек тойғоһо, әҙәп һаҡлау

**ТА́К-ТАКИ** *частица; разг.* (*всё же*) барыбер, шуға ҡарамаҫтан, шулай ҙа; **та́к-таки суме́л сде́лать** шулай ҙа эшләй алды

**ТА́КТИК** *м* тактик (*тактика оҫтаһы*)

**ТА́КТИКА** *ж; прям., перен.* тактика; **разрабо́тать та́ктику веде́ния войны́** һуғыш алып барыу тактикаһын эшләү; **революцио́нная та́ктика пролетариа́та** пролетариаттың революцион тактикаһы; **хи́трая та́ктика** хәйләле тактика

**ТАКТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тактик; **такти́ческая зада́ча** тактик бурыс; **такти́ческое руково́дство** тактик етәкселек

**ТАКТИ́ЧНОСТЬ** *ж* әҙәплелек, иплелек, тактлылыҡ; **прояви́ть такти́чность** әҙәплелек күрһәтеү

**ТАКТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое әҙәпле, ипле, тактлы; **такти́чный челове́к** әҙәпле кеше

**ТА́КТОВЫЙ,** -ая, -ое *муз.* такт(тар) ...ы; **та́ктовая черта́** такт һыҙығы

**ТАЛА́НТ** *м* **1.** һәләтлелек, һәләт; **музыка́льный тала́нт** музыкаға һәләт; **развива́ть свой тала́нт** үҙ һәләтеңде үҫтереү **2.** (*одарённый человек*) һәләтле кеше, талант; **молоды́е тала́нты** йәш таланттар

**ТАЛА́НТЛИВОСТЬ** *ж* талантлылыҡ, талантлы булыу, талант эйәһе булыу

**ТАЛА́НТЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о человеке*) талантлы, һәләтле; **тала́нтливый худо́жник** талантлы рәссам **2.** (*о художественном произведении*) уңышлы, талантлы (яҡшы) яҙылған; **тала́нтливый расска́з** яҡшы яҙылған хикәйә

**ТА́ЛЕР I** *м* талер, талир тәңкә (*немецтарҙа боронғо көмөш аҡса*)

**ТА́ЛЕР II** *м*; *типогр.* талер (*баҫыу машинаһының бер өлөшө*)

**ТА́ЛИ** *мн.* тали (*йөк күтәргес яйланма*)

**ТАЛИСМА́Н** *м* талсым, бетеү

**ТА́ЛИЯ** *ж* бил; **то́нкая та́лия** нескә бил ♦ **в та́лию** билле

**ТА́ЛЛИЙ** *м* таллий (*химик элемент, ялтыр төҫтәге тиҙ иреүсән металл*)

**ТАЛМУ́Д** *м* **1.** Талмуд (*йәһүдтәрҙең дин, хоҡуҡ, көнкүреш мәсьәләләре хаҡындағы ҡағиҙәләр йыйынтығы*) **2.** *перен., разг., шутл.* талмуд (*ҡалын китап*)

**ТАЛМУДИ́ЗМ** *м* талмудсылыҡ

**ТАЛМУДИ́СТ** *м* **1.** Талмуд белгесе, талмудсы **2.** *перен.* (*схоласт*) талмудсы

**ТАЛО́Н** *м* талон, йорҡа; **тало́н на бензи́н** бензин талоны; **отрывно́й тало́н** йыртма йорҡа

**ТАЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое талон ...ы, йорҡа ...ы; **тало́нная систе́ма** талон системаһы

**ТА́ЛЫЙ,** -ая, -ое ирегән, иреү; (*о снеге*) еппшек, мәреү; **та́лый снег** мәреү ҡар; **та́лая земля́** иреү ер; **та́лая ры́ба** иреү балыҡ; **та́лый лёд** ирегән боҙ

**ТАЛЬК** *м* тальк (*аҡ йәки йәшкелт төҫтәге йомшаҡ минерал*); **посы́пать та́льком** тальк һибеү; **за́лежи та́лька** тальк ятҡылығы

**ТАЛЬНИ́К** *м* **1.** ҡыуаҡ тал (*тал ағасының ҡыуаҡлы төрө*) **2.** *собир.* талсыбыҡ (*ошо ҡыуаҡтың сыбыҡтары*)

**ТАЛЬНИКО́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡыуаҡ тал ...ы; **тальнико́вые за́росли** ҡыуаҡ тал әрәмәлеге

**ТАЛЬЯ́НКА** *ж*; *прост., муз.* тальян, тальян гармун; **игра́ть на тальянке** тальянда уйнау

**ТАМ** *нареч.* **1.** (*в том месте*) унда, шунда, тегендә; **там вдали́ за реко́й** тегендә йылға аръяғында **2.** (*потом, затем*) унда, унан һуң, аҙаҡ; **там ви́дно бу́дет** аҙаҡ күҙ күрер **3.** *в знач. частицы*; *разг.* (*для усиления отрицания чего-л., возражения на что-л.*) ҡайҙа ул, унда; **каки́е там у неё дела́!** уның унда ниндәй эше бар! ♦ **та́м и ся́м**; **там-ся́м**; **та́м и ту́т** тегендә лә бында ла, тегендә-бында, унда ла бында ла; **то ту́т, то та́м**; **то та́м, то ся́м** әле тегендә, әле бында; **чего́ там** юкты ни (*бошмау, тартынмауҙы белдерә*)

**ТАМАДА́** *м* аяҡсы, табынсы, тамада

**ТА́МБУР I** *м* **1.** *ж.-д.* тамбур (*пассажир вагонының ике башында ла булған өҫтө ябыҡ майҙансыҡ*) **2.** *архит.* солан, алғы бүлмә

**ТА́МБУР II** *м* (*род вышивки*) ҡабартма ҡайыу, ҡабартмалы сигеү, тамбур

**ТАМБУ́Р** *м*; *муз.* тамбур (*ҡыллы музыка ҡоралы*)

**ТАМБУРИ́Н** *м*; *муз.* **1.** (*барабан с удлинённым корпусом*) тамбурин **2.** (*род бубна*) шөңгөр

**ТАМГА́** *ж*; *этн., уст., обл.* (*знак собственности*) тамға; **тамга́ в ви́де серпа́** ай (ураҡ) тамға; **тамга́ родово́го подразделе́ния** ырыу-ара тамғаһы

**ТАМО́ЖЕННИК** *м* таможня хеҙмәткәре, таможняла хеҙмәт итеүсе

**ТАМО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое таможня ...ы; **тамо́женная по́шлина** таможня пошлинаһы

**ТАМО́ЖНЯ** *ж* таможня (*ил сиге аша үтә торған тауарҙарҙы тикшереүсе һәм махсус пошлина алыу эштәрен башҡарыусы учреждение*)

**ТА́МОШНИЙ,** -яя, -ее *разг.* ундағы, шундағы, тегендәге; **та́мошний жи́тель** шундағы кеше

**ТАМПО́Н** *м* тампон (*яра эсенә ҡуйыла торған махсус әҙерләнгән мамыҡ йәки марля киҫәге*); **заложи́ть тампо́н в ра́ну** яраға тампон һалыу

**ТАМПОНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *мед.* тампон һалыу (ҡуйыу)

**ТАМ-СЯ́М** *нареч. см.* **там**

**ТАМТА́М** *м*; *муз.* тамтам (*Африка халыҡтарында ҙур барабандың бер төрө*); **зву́ки тамта́ма** тамтам тауыштары

**ТА́НГЕНС** *м*; *мат.* тангенс (*мөйөштөң тригонометрик функцияларының береһе*)

**ТА́НГО** *с нескл.* танго (*бейеү һәм шуға яҙылған көй*)

**ТАНДЫ́Р** *м* (*печь*) тандыр; **печь хлеб в танды́ре** тандырҙа икмәк бешереү

**ТА́НЕЦ** *м* **1.** танса, бейеү; **ба́льные та́нцы** бал бейеүҙәре; **наро́дный та́нец** халыҡ бейеүе; **исполня́ть та́нец** бейеү башҡарыу **2.** (*вид искусства*) бейеү; **мастерство́ та́нца** бейеү оҫталығы **3.** *мн.* **та́нцы** танса; **пригласи́ть на та́нцы** тансаға саҡырыу

**ТАНИ́Н** *м* танин (*дуплаусы матдә*); **бога́тые тани́ном расте́ния** танинға бай үҫемлектәр

**ТАНК** *м* танк; **лёгкий танк** еңел танк; **води́ть танк** танк йөрөтөү

**ТА́НКЕР** *м* танкер (*судно төрө*); **нефтяно́й та́нкер** нефть танкеры

**ТАНКЕ́ТКА** *ж* танкетка (*тиҙ йөрөшлө бәләкәй танк*)

**ТАНКЕ́ТКИ** *мн.* (*ед.* **танке́тка** *ж*) танкетка (*ҡатын-ҡыҙҙарҙың аяҡ кейеме*)

**ТАНКИ́СТ** *м* танкист, танк йөрөтөүсе; **быть танки́стом** танкист булыу; **День танки́ста** Танкист көнө

**ТАНКО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "танк" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.,* **танковожде́ние** танк йөрөтөү

**ТА́НКОВЫЙ,** -ая, -ое танк ...ы; **та́нковые войска́** танк ғәскәрҙәре; **та́нковый деса́нт** танк десанты

**ТАНКОДРО́М** *м* танкодром (*танкыларҙы һынау урыны*)

**ТАНКОСТРОЕ́НИЕ** *с* танкылар төҙөү (эшләп сығарыу)

**ТАНКОСТРОИ́ТЕЛЬ** *м* танк төҙөүсе

**ТАНКОСТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое танк төҙөү (эшләү) ...ы; **танкострои́тельная промы́шленность** танк эшләү сәнәғәте

**ТАНТА́Л** *м* тантал (*химик элемент, бик ҡаты металл*)

**ТАНТА́ЛОВ: танта́ловы му́ки** үҙ-үҙеңде ғазаплау, йән ғазабы

**ТАНЦЕВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бейеү ...ы, танса ...ы; **танцева́льный ве́чер** бейеү кисәһе

**ТАНЦЕВА́ТЬ** *несов. что* и *без доп.* бейеү; **уме́ть танцева́ть** бейей белеү

**ТАНЦМЕ́ЙСТЕР** *м* бейеү ҡуйыусы, бейеүгә өйрәтеүсе

**ТАНЦО́ВЩИК** *м* и **ТАНЦО́ВЩИЦА** *ж* бейеүсе; **танцо́вщик бале́та** балетта бейеүсе

**ТАНЦО́Р** *м* **1.** бейеүсе, бейей белеүсе; **хоро́ший танцо́р** яҡшы бейеүсе **2.** *уст. см.* **танцо́вщик**

**ТАНЦПЛОЩА́ДКА** *ж* танса майҙаны

**ТАНЦУ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **танцева́ть 2.** *прил.* бейегән кеүек, бейегәнгә оҡшаған; **танцу́ющая похо́дка** бейегән кеүек атлау **3.** *в знач. сущ.* **танцу́ющие** *мн.* бейеүселәр

**ТАПЁР** *м* и *разг.* **тапёрша** *ж* тапёр (*бейеү кисәләрендә ялланып уйнаған музыкант*)

**ТАПИ́Р** *м* тапир (*Американың һәм Көньяҡ-Көнсығыш Азияның тропик урмандарында йәшәүсе йомро тояҡлы эре имеҙеүсе хайуан*)

**ТА́ПКИ** *мн.* (*ед.* **та́пка** *ж*) сүбәк, шипатай, тапочка

**ТА́ПОЧКИ** *мн.* (*ед.* **та́почка** *ж*); *разг. см.* **та́пки**; **ходи́ть в та́почках** сүбәк кейеп йөрөү

**ТА́РА** *ж* тара (**1.** *тауар һала торған төрлө һауыт; шундай һауыттарҙың ауырлығы* **2.** *тауар ташый торған вагондар, автомашиналар ауырлығы*)

**ТАРАБА́НИТЬ** *несов.*; *прост.* дөбөрҙәтеү, дөбөр-шатыр итеп ҡағыу

**ТАРАБА́РСКИЙ,** -ая, -ое *перен.*, *разг.* аңлайышһыҙ, мәғәнәһеҙ; **тараба́рская речь** аңлайышһыҙ телмәр

**ТАРАБА́РЩИНА** *ж*; *разг.* аңлайышһыҙ (мәғәнәһеҙ) булыу

**ТАРАКА́Н** *м* тараҡан; **чёрный тарака́н** ҡара тараҡан

**ТАРАКА́НИЙ,** -ья, -ье тараҡан ...ы; **тарака́ньи усы́** тараҡан мыйыҡтары

**ТАРА́Н** *м* **1.** *ист.* ҡусҡарбаш, таран (*боронғо һуғыштарҙа ҡәлғә стеналарын емереү ҡоралы*) **2.** *воен.* таран (*дошман самолётын, карабын йәки танкыһын үҙ самолётың, карабың йәки танкың менән бәрҙереү*); **идти́ на тара́н** таранға барыу ♦ **гидравли́ческий тара́н** гидравлик таран

**ТАРА́НИЙ,** -ья, -ье таран ...ы; **тара́нья икра́** таран уылдырығы

**ТАРА́НИТЬ** *несов. что* таранлау, төкөтөү; **тара́нить сте́ну** стенаны таранлау; **тара́нить самолёт** самолётты таранлау

**ТАРАНТА́С** *м* кырандас, ситән арба

**ТАРАНТЕ́ЛЛА** *ж* тарантелла (*Италияла халыҡ бейеүе һәм шуға яҙылған музыка әҫәре*)

**ТАРА́НТУЛ** *м* тарантул, бөйө (*ағыулы үрмәксе*)

**ТАРА́НЬ** *ж* таран (*балыҡ*); (*мелкая тарань*) таранса́й

**ТАРАРА́М** *м*; *разг.* ғауға, тауыш, янъял; **подня́ть тарара́м** янъял ҡуптарыу

**ТАРАРА́ХАТЬ** *несов. см.* **тарара́хнуть**

**ТАРАРА́ХНУТЬ** *сов.*; *разг.* шатыр-шотор килеү, шатырлау, гөрһөлдәү

**ТАРАТА́ЙКА** *ж* ҡуян арба (*ике тәгәрмәсле арба*)

**ТАРАТО́РИТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *разг.* лығырлау, лабырлау, таҡылдау, бытырлау

**ТАРАТО́РКА** *м* и *ж*; *разг.* лабырлаҡ, лығырлаҡ, һүҙсән, таҡылдаҡ, лыҡылдаҡ

**ТАРАХТЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** даһырлау, тырылдау, дыңғырлау; (*о моторе*) тырылдау; **тра́ктор тарахти́т** трактор тырылдай **2.** (*быстро, без умолку говорить*) бытырлау, лығырлау, лабырлау, таҡылдау

**ТАРА́ЩИТЬ** *несов. что*; *разг.* таҫрайтыу, аҡайтыу, аҡшайыу; **тара́щить глаза́** күҙ таҫрайтыу

**ТАРА́ЩИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** (*широко раскрываться — о глазах*) таҫрайыу, аҡайыу, аҡшайыу **2.** *на кого-что* аҡайып ҡарау

**ТАРБАГА́Н** *м* тарбаған (*дала һыуыры*)

**ТАРБАГА́НИЙ,** -ья, -ье тарбаған ...ы; **тарбага́нья нора́** тарбаған ояһы

**ТАРЕ́ЛКА** *ж* **1.** тәрилкә, таштабаҡ; **глубо́кая таре́лка** тәрән тәрилкә **2.** *мн.* **таре́лки**; *муз.* тарелка (*бер-береһенә һуғып уйнай торған музыка ҡоралы*) ♦ **лета́ющая таре́лка** осоусы тәрилкә; **быть не в свое́й таре́лке** кәйеф булмау, күңел төшөү

**ТАРИ́Ф** *м* тариф (*берәй нәмә өсөн билдәләнгән түләү*); **железнодоро́жный тари́ф** тимер юл тарифы; **тари́фы опла́ты труда́** эш хаҡы тарифтары; **еди́ные тари́фы** берҙәм тарифтар

**ТАРИФИКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое тарификация ...ы; **тарификацио́нный спра́вочник** тарификация белешмәһе

**ТАРИФИКА́ЦИЯ** *ж* тарификация, тарификациялау, тариф билдәләү; **тарифика́ция за́работной пла́ты** эш хаҡын түләү тарификацияһы

**ТАРИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* тарификация үткәреү, тарификациялау, тариф билдәләү

**ТАРИФИЦИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **тарифици́ровать**

**ТАРИ́ФНЫЙ,** -ая, -ое тариф ...ы; **тари́фная ста́вка** тариф ставкаһы

**ТА́РНЫЙ,** -ая, -ое тара ...ы; **та́рный я́щик** тара йәшниге

**ТАРПА́Н** *м* тарпан (*ҡырағай ат*)

**ТА́РТАР** *м* **1.** (*в древнегреческой мифологии: подземное царство мёртвых*) Тартар **2.** (*ад, преисподняя*) тамуҡ, йәһәннәм

**ТАРТАРАРЫ́** *мн. нескл.*; *разг. см.* **та́ртар** 2 ♦ **провали́ться в тартарары́** *разг.* йәһәннәм аҫтына китеү, бөтөнләй юҡ булыу

**ТАРХА́Н** *м*; *ист.* тархан (**1.** *феодаль замандарҙа эре ер биләүсе* **2.** *шул өҫтөнлөктәр менән файҙаланыу грамотаһы*)

**ТАРХА́НСТВО** *с*; *ист.* тарханлыҡ; **получи́ть тарха́нство** тарханлыҡ алыу

**ТА́РЫ-БА́РЫ, ТА́РЫ ДА БА́РЫ, ТА́РЫ-БА́РЫ-РАСТАБА́РЫ** *мн. нескл.*; *прост.* юҡ-бар һүҙ

**ТАСКА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* ташыу, күтәреп ташыу, йөрөтөү; **таска́ть дрова́** утын ташыу; **таска́ть во́локом** һөйрәп йөрөтөү **2.** *кого*; *разг.* (*дёргать*) тартыу; **таска́ть за́ уши** ҡолағынан тартыу **3.** *разг.* (*воровать*) урлау **4.** *что*; *разг.* (*носить — об одежде, обуви*) кейеү, кейеп йөрөү ♦ **е́ле (с трудо́м) но́ги таска́ть** *разг.* аяҡты саҡ һөйрәү, хәлдән тайыу

**ТАСКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.*, *неодобр.* ҡыҙырыу, эшһеҙ (буш, тик) йөрөү, һәптәнләү; **таска́ться по у́лицам** урамда тик йөрөү **2.** *с чем* күтәреп йөрөтөү; **таска́ться с су́мкой** сумка күтәреп йөрөү **3.** *страд. от* **таска́ть**

**ТАСОВА́ТЬ** *несов. что* аралаштырыу, бутау; **тасова́ть ка́рты** кәрттәрҙе аралаштырыу

**ТАТА́РНИК** *м* сәнскәк, шайтан таяғы

**ТАТА́РСКИЙ,** -ая, -ое татар …ы; **тата́рский наро́д** татар халҡы

**ТАТА́РЫ** *мн.* татарҙар, татар халҡы // *ед.* **тата́рин** *м* татар ир-аты; **тата́рка** *ж* татар ҡатын-ҡыҙы

**ТА́ТСКИЙ,** -ая, -ое тат …ы; **та́тский язы́к** тат теле

**ТАТУИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* тәнгә биҙәк (һүрәт) яһау

**ТАТУИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* тәнгә биҙәктәр яһау, татуировкалау **2.** *несов. страд. от* **татуи́ровать**

**ТАТУИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **татуи́ровать — татуи́роваться** 1; **2.** (*рисунок на коже*) татуировка (*энә менән сәнсеп, буяп тәнгә яһалған һүрәт*)

**ТА́ТЫ** *мн.* таттар, тат халҡы // *ед.* **тат** *м* тат ир-аты; **та́тка** *ж* тат ҡатын-ҡыҙы

**ТА́У-САГЫ́З** *м* тау һағыҙы (*каучуклы күп йыллыҡ үҫемлек*)

**ТАФТА́** *ж* тафта (*йоҡа ебәк туҡыма*)

**ТАХИКАРДИ́Я** *ж*; *мед.* тахикардия (*йөрәк тибеүенең йышайыуы*)

**ТАХТА́** *ж* тахта (*артһыҙ киң диван*)

**ТАЧА́НКА** *ж* тачанка (*пар атҡа егелә торған йәки пулемёт ҡуйылған еңел арба*)

**ТАЧА́ТЬ** *несов. что* тегеү, типсеп тегеү; **тача́ть сапоги́** итек тегеү

**ТАЧКА I** *ж см.* **тача́ть**

**ТА́ЧКА II** *ж* тачка (*бер тәгәрмәсле ҡул арбаһы*)

**ТАЩИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что*; *разг.* ташыу, күтәреп алып барыу, һөйрәү; **тащи́ть са́нки** сана һөйрәү; **тащи́ть бревно́** бүрәнәне күтәреп алып барыу **2.** *кого*; *разг.* (*везти или вести за собой*) алып барыу, һөйрәү; **тащи́ть на верёвке козу́** арҡан менән кәзәне һөйрәү **3.** (*извлекать*) һурып сығарыу; **тащи́ть гвоздь** ҡаҙауҙы һурып сығарыу **4.** *что* (*снимать*) тартып сисеү (сығарыу); **тащи́ть сапо́г с ноги́** итекте тартып сисеү **5.** *разг.* (*красть*) урлау, урлап китеү ♦ **тащи́ть (тяну́ть) за́ уши** ҡолағынан тартып йөрөтөү (*артыҡ әпәүләү, ҡурсалау*)

**ТАЩИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* (*передвигаться медленно, с трудом*) саҡ ҡуҙғалыу, бик әкрен барыу; **теле́га та́щится по доро́ге** арба юл буйлап әкрен генә бара **2.** (*волочиться по земле*) һөйрәлеү; **верёвка та́щится по земле́** бау ерҙән һөйрәлеп бара **3.** *страд. от* **тащи́ть**

**ТА́ЯНИЕ** *ж см.* **та́ять**; **та́яние снего́в** ҡар иреүе

**ТА́ЯТЬ** *несов.* **1.** ирeү; **лёд та́ет** боҙ ирей **2.** *безл.* иретеү; **на у́лице та́ет** тышта иретә **3.** *перен.* (*постепенно исчезать*) кәмеү, кәмей (юғала) барыу; **си́лы та́ют** көс кәмей бара **4.** *перен.*, *разг.* (*млеть*) иреп китеү, күңел йомшау; **та́ять от удово́льствия** рәхәтлектән иреп китеү **5.** *перен.* (*худеть, чахнуть*) һулыу, һыҙыу; **та́ять от го́ря** ҡайғынан һулыу

**ТВАРЬ** *ж* **1.** *уст.*, *прост.* (*живое существо*) януар, хайуан, мәхлүк **2.** *прост.*, *бран.* (*о человеке*) меҫкен, мәхлүк, хайуан

**ТВЕРДЕ́ТЬ** *несов.* ҡатыу, ҡатыланыу

**ТВЕРДИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что*, *о чём* тылҡыу, туҡыу, ҡат-ҡат әйтеү; **тверди́ть постоя́нно** туҡып тороу; **тверди́ть своё** үҙенекен тылҡыу **2.** *что*; *разг.* (*заучивать*) ятлау, ҡабатлау; **тверди́ть уро́к** дәресте ятлау

**ТВЕРДОКА́МЕННЫЙ,** -ая, -ое (*непоколебимый*) таштай ныҡ, таш кеүек ҡаты

**ТВЕРДОЛО́БЫЙ,** -ая, -ое *разг.* таш (ҡаҡ, ҡаты) маңлай, туң, аңра

**ТВЁРДОСТЬ** *ж* **1.** *физ.* ныҡлыҡ, ҡатылыҡ; **твёрдость те́ла** матдәнең ныҡлығы; **твёрдость древеси́ны** үҙағастың ҡатылығы **2.** *перен.* (*непоколебимость*) ҡаҡшамаҫлыҡ, тотороҡлолоҡ, ҡатылыҡ; **прояви́ть твёрдость** тотороҡлолоҡ күрһәтеү

**ТВЕРДОТО́ПЛИВНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* ҡаты яғыулыҡлы; **твердото́пливные раке́ты** ҡаты яғыулыҡлы ракеталар

**ТВЁРДЫЙ,** -ая, -ое **1.** ныҡ, ҡаты; **твёрдые тела́** ҡаты матдәләр **2.** ҡаты, суй; **твёрдый грунт** ҡаты грунт; **твёрдая земля́** ҡаты ер **3.** *перен.* (*непоколебимый*) ныҡлы; **твёрдое убежде́ние** ныҡлы ышаныс **4.** (*безошибочный*) төплө; **твёрдые зна́ния** төплө белем **5.** *перен.* (*прочный, устойчивый*) тотороҡло, ҡаты, ныҡ(лы); **твёрдые це́ны** тотороҡло хаҡтар; **твёрдая дисципли́на** ҡаты тәртип; **твёрдый шаг** ныҡлы аҙым ♦ **твёрдый знак** ҡатылыҡ билдәһе; **твёрдые согла́сные** *лингв.* ҡалын тартынҡылар

**ТВЕРДЫ́НЯ** *ж* **1.** *высок.* (*крепость*) ныҡытма **2.** *перен.* (*оплот*) ныҡлы таяныс, терәк

**ТВЕРДЬ** *ж*; *уст.*, *трад.-поэт.* ҡоро ер

**ТВИН** *м* твин (*туҡыма төрө*)

**ТВИНДЕ́К** *м*; *мор.* твиндек (*ике палуба араһында йөк һәм пассажирҙар өсөн буш урын*)

**ТВИСТ** *м* твист (*ике кеше башҡара торған характерлы ритмик бейеү*)

**ТВОЁ** *с мест. см.* **твой**

**ТВОИ́** *мн. мест. см.* **твой**

**ТВОЙ** *м* (твоя *ж*, твоё *с*) *мест.* **1.** һинең; **твоя́ кни́га** һинең китабың **2.** *в знач. сущ.* **твои́** *мн.*; *разг.* һинекеләр; **как твои́ пожива́ют?** һинекеләр нисек йәшәй? **3.** *в знач. сущ.* **твоё** *с*; *разг.* һинеке; **твоего́ мне не ну́жно** һинеке миңә кәрәкмәй **4.** *в знач. сущ.* **твой** *м* и **твоя́** *ж* һинеке (*ир һәм ҡатын*) ♦ **твоё де́ло** һинең эш (*үҙең хәл итәһең*); **не твоё де́ло** һинең эшең түгел (*ҡыҫылма*)

**ТВОРЕ́НИЕ** *с* **1.** *уст. см.* **твори́ть** 1; **2.** (*произведение*) әҫәр; **творе́ния Мустя́я Кари́ма** Мостай Кәрим әҫәрҙәре **3.** *уст.* (*живое существо*) зат

**ТВОРЕ́Ц** *м* **1.** *высок.* (*создатель*) тыуҙырыусы, ижад итеүсе, ижадсы; **наро́д — творе́ц исто́рии** халыҡ — тарихты тыуҙырыусы **2.** *рел.* (*Бог*) Хоҙай, Тәңре, Алла

**ТВОРИ́ЛО** *м*; *спец.* иҙеү (иретеү) һауыты (*балсыҡ, эзбиз һ.б. иҙә торған*)

**ТВОРИ́ТЕЛЬНЫЙ: твори́тельный паде́ж** *грам.* творительный падеж (килеш)

**ТВОРИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*создавать в процессе творчества*) булдырыу, тыуҙырыу, ҡороу, ижад итеү, барлыҡҡа килтереү, төҙөү; **твори́ть произведе́ния** әҫәрҙәр тыуҙырыу **2.** (*совершать, делать*) атҡарыу, эшләү; **твори́ть добро́** изгелек эшләү

**ТВОРИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* (*совершаться, происходить*) булыу, булып ятыу, эшләнеп ятыу; **что здесь твори́тся?** ни булып ята бында? **2.** *страд. от* **твори́ть**

**ТВОРО́Г** и **ТВО́РОГ** *м* эремсек; **творо́г со смета́ной** ҡаймаҡ менән эремсек; **кра́сный тво́рог** ҡыҙыл эремсек

**ТВОРО́ЖИСТЫЙ,** -ая, -ое эремсек кеүек (һымаҡ), эремсектәй; **творо́жистая ма́сса** эремсек кеүек масса

**ТВОРО́ЖИТЬ** *несов.*, *что* эретеү, эремсеккә әйләндереү, эремсек яһау

**ТВОРО́ЖИТЬСЯ** *несов.* **1.** эреү, эремсекләнеү, эремсеккә әйләнеү **2.** *страд. от* **творо́жить**

**ТВОРО́ЖНИК** *м*; *кул.* эремсек ҡабартмаһы

**ТВОРО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое эремсек ...ы; **тво́рожный миро́г** эремсек бәрәмәсе

**ТВО́РЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ижад, ижади; **тво́рческий путь писа́теля** яҙыусының ижад юлы; **тво́рческая рабо́та** ижади эш; **тво́рческая де́ятельность** ижади эшмәкәрлек

**ТВО́РЧЕСТВО** *с* **1.** (*деятельность*) ижади эш, ижад, ижад итеү, ижадсылыҡ; **занима́ться тво́рчеством** ижади эш менән шөғөлләнеү; **худо́жественное тво́рчество** художестволы ижад **2.** ижад; **наро́дное тво́рчество** халыҡ ижады

**ТВОЯ́** *ж мест. см.* **твой**

**ТЕ** *мн. мест. см.* **тот**; **пришли́ те и други́е** былары ла, тегеләре лә килде

**ТЕА́ТР** *м* **1.** *в разн. знач.* театр; **драмати́ческий теа́тр** драма театры; **увлека́ться теа́тром** театр менән мауығыу; **идти́ в теа́тр** театрға барыу **2.** *чего*; *перен.* (*место, где происходит что-л.*) майҙан, ҡыр; **теа́тр вое́нных де́йствий** һуғыш майҙаны

**ТЕАТРА́Л** *м* театр яратыусы, театр һөйөүсе

**ТЕАТРАЛИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **театрализова́ть** **2.** *прил.* театрлаштырылған; **театрализо́ванное представле́ние** театрлаштырылған тамаша

**ТЕАТРАЛИЗОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. что* сәхнәләштереү; **театрализова́ть рома́н** романды сәхнәләштереү

**ТЕАТРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** театр ...ы, театраль; **театра́льный биле́т** театр билеты; **театра́льный сезо́н** театраль сезон **2.** *перен.* (*неестественный*) яһалма, тәбиғи булмаған; **театра́льный жест** яһалма хәрәкәт

**ТЕАТРОВЕ́Д** *м* театрҙы өйрәнеүсе, театр сәнғәте белгесе

**ТЕАТРОВЕ́ДЕНИЕ** *с* театр сәнғәте белеме

**ТЕБЕНЕВА́ТЬ** *несов.* тибендә йөрөү

**ТЕБЕНЁВКА** *ж* тибен, тибендә йөрөтөү (*ҡыш көнө малдарҙы, ҡүберәк йылҡыларҙы, яланда йөрөтөү*)

**ТЕВТО́НСКИЙ,** -ая, -ое тевтондар ...ы; ♦ **Тевто́нский о́рден** *ист.* Тевтондар ордены (*XIII—XIV бб. немец рыцарҙарының рухани-хәрби ойошмаһы*)

**ТЕВТО́НЫ** *мн.* тевтондар (*боронғо герман ҡәбиләләре*)

**ТЕ́ЗИС** *м* тезис (**1.** *доклад, лекция һ.б. положениелары* **2.** *лог. иҫбатланырға тейеш положение* **3.** *фәлс. идеалистик фәлсәфәлә үҫеш процесының беренсе стадияһы*)

**ТЁЗКА** *м* и *ж*; *разг.* аҙаш; **он мой тёзка** ул минең аҙашым

**ТЕИ́ЗМ** *м* теизм (*донъя Алла ихтыяры менән барлыҡҡа килтерелгән һәм уның тарафынан идара ителә, тип һанаған дини-фәлсәфәүи тәғлимәт*)

**ТЕИ́СТ** *м* теист (*теизм юлынан барыусы*)

**ТЕКСТ** *м*; *в разн. знач.* текст; **текст пе́сни** йыр тексы; **сдать текст в типогра́фию** тексты типографияға тапшырыу

**ТЕКСТИ́ЛЬ** *м собир.* туҡыма, текстиль, туҡыма әйберҙәр

**ТЕКСТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое туҡыу ...ы, текстиль ...ы; **тексти́льная фа́брика** туҡыу фабрикаһы

**ТЕКСТИ́ЛЬЩИК** *м* и **ТЕКСТИ́ЛЬЩИЦА** *ж* туҡыусы (*туҡыу сәнғәте эшсеһе*)

**ТЕКСТОВО́Й,** -ая, -ое *в разн. знач.* текст ...ы; **текстово́й шрифт** *типогр.* текст шрифы

**ТЕКСТОЛИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **текстоли́т** *м*) текстолит (*катлы-катлы юғары ныҡлыҡтағы пластмасса*)

**ТЕКСТО́ЛОГ** *м* текстолог (*текстология белгесе*)

**ТЕКСТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое текстология ...ы, текстологик; **текстологи́ческое иссле́дование** текстологик тикшеренеү

**ТЕКСТОЛО́ГИЯ** *ж* текстология (*әҙәбиәт ғилеменең текстарҙы өйрәнеү һәм уларҙы баҫтырып сығарыу менән шөғөлләнгән бүлеге*)

**ТЕКСТУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** текст ...ы; **текстуа́льные вариа́нты** текст варианттары **2.** (*дословный*) һүҙмә-һүҙ, текстуаль; **текстуа́льный перево́д** текстуаль тәржемә

**ТЕКСТУ́РА** *ж*; *спец.* текстура; **тексту́ра древеси́ны** үҙағастың текстураһы

**ТЕКТО́НИКА** *ж* тектоника (**1.** *Ер ҡабығы участкаларының төҙөлөшө* **2.** *геологияның Ер ҡабығында тау тоҡомдарының ятышын һәм улар араһында булған бәйләнеште өйрәнә торған бүлеге*)

**ТЕКТОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тектоник, тектоника ...ы; **тектони́ческие явле́ния** тектоник күренештәр

**ТЕКУ́ЧЕСТЬ** *ж* **1.** ағыусанлыҡ, аға алыу **2.** *перен.* (*непостоянство*) алмашыныусанлыҡ, даими булмау, килеп-китеп тороу; **теку́честь рабо́чей си́лы** эшсе көстәрҙең даими булмауы

**ТЕКУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** аға торған, ағыусан, шыйыҡ; **теку́чие тела́** *физ.* ағыусан есемдәр **2.** (*проточный — о воде*) ағым **3.** *перен.* (*непостоянный*) алмашынып (үҙгәреп) тора торған, даими булмаған, үҙгәреүсән

**ТЕКУ́ЧКА** *ж*; *разг.* көндәлек эш

**ТЕКУ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **течь** I; **2.** *прил.* (*теперешний*) хәҙерге, ағымдағы; **теку́щий моме́нт** хәҙерге момент; **теку́щие зада́чи** ағымдағы бурыстар; **в теку́щем году́** ошо йылда **3.** *прил.* (*повседневный*) көндәлек, ғәҙәттәге, ағымдағы; **теку́щие дела́** көндәлек эштәр ♦ **теку́щий ремо́нт** ғәҙәттәге ремонт; **теку́щий счёт** ағымдағы иҫәп (*банкыла, һаҡлыҡ кассаһында*)

**ТЕЛЕ...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "телевизион", "телевизор", "телевидение" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.*, **телесъёмка** телевидениеға төшөрөү

**ТЕЛЕАТЕЛЬЕ́** *с нескл.* телеателье (*телевизорҙар төҙәтеү ательеһы*)

**ТЕЛЕБА́ШНЯ** *ж* телебашня (*телевизион башня*)

**ТЕЛЕВЕЩА́НИЕ** *с* телетапшырыу; **програ́мма телевеща́ния** телетапшырыуҙар программаһы

**ТЕЛЕВИ́ДЕНИЕ** *с* телевидение; **систе́ма телеви́дения** телевидение системаһы

**ТЕЛЕВИЗИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** телевизион, телевидение ...ы; **телевизио́нный центр** телевидение үҙәге **2.** телевидение аша; **телевизио́нная переда́ча** телевидение аша тапшырыу

**ТЕЛЕВИ́ЗОР** *м* телевизор; **цветно́й телеви́зор** төҫлө телевизор

**ТЕЛЕ́ГА** *ж* арба; **запря́чь ло́шадь в теле́гу** атты арбаға егеү; **е́хать на теле́ге** арбала барыу

**ТЕЛЕГРА́ММА** *ж* телеграмма; **сро́чная телегра́мма** ашығыс телеграмма; **посла́ть телегра́мму** телеграмма ебәреү, телеграмма һуғыу; **телегра́мма-мо́лния** бик ашығыс телеграмма

**ТЕЛЕГРА́Ф** *м* телеграф (**1.** *алыҫҡа тиҙ хәбәр биреү ысулы* **2.** *телеграф бинаһы*)

**ТЕЛЕГРАФИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* телеграмма биреү (ебәреү, һуғыу); **телеграфи́ровать о прие́зде** ҡайтыу тураһында телеграмма биреү

**ТЕЛЕГРАФИ́СТ** *м* и **ТЕЛЕГРАФИ́СТКА** телеграфсы, телеграфта эшләүсе

**ТЕЛЕГРАФИ́Я** *ж* телеграфия (*телеграф эше, телеграфтан сигналдар биреү техникаһы*)

**ТЕЛЕГРА́ФНЫЙ,** -ая, -ое **1.** телеграф ...ы; **телегра́фные столбы́** телеграф бағаналары **2.** телеграф ярҙамында (аша); **телегра́фная связь** телеграф аша бәйләнеш

**ТЕЛЕ́ЖКА** *ж* **1.** бәләкәй арба, ҡул арбаһы **2.** *спец.* (*подвижная часть машин*) тележка; **кра́новая теле́жка** кран тележкаһы

**ТЕЛЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое арба ...ы; **теле́жные колёса** арба тәгәрмәстәре

**ТЕЛЕЖУРНА́Л** *м* тележурнал (*телевизион журнал*)

**ТЕЛЕЖУРНАЛИ́СТ** *м* тележурналист (*телевидение журналисы*)

**ТЕЛЕЗРИ́ТЕЛЬ** *м* телевизор ҡараусы

**ТЕЛЕКА́МЕРА** *ж* телекамера; **выступа́ть пе́ред телека́мерой** телекамера алдында сығыш яһау

**ТЕЛЕКОММЕНТА́ТОР** *м* телекомментатор (*телевидение комментаторы*)

**ТЕЛЕКОМПА́НИЯ** *ж* телекомпания

**ТЕ́ЛЕКС** *м* телекс (*абонентлы халыҡ-ара телеграф селтәре*)

**ТЕЛЕМЕХА́НИКА** *ж*; *тех.* телемеханика (*механизм ярҙамында алыҫтан идара итеү һәм шуның системаһын өйрәнеүсе фән һәм техника тармағы*)

**ТЕЛЕМЕХАНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое телемеханик

**ТЕЛЁНОК** *м* **1.** быҙау; (*родившийся летом*) сәңгәр; (*родившийся осенью*) һарайаҡ **2.** (*детёныш оленя*) болан балаһы; (*детёныш лося*) мышы балаһы **3.** *перен.*, *разг.* (*о безвольном человеке*) быҙау

**ТЕЛЕОБЪЕКТИ́В** *м* телеобъектив (*алыҫтан ҙурайтып күрһәтә торған*)

**ТЕЛЕОЛО́ГИЯ** *ж*; *филос.* телеология (*алдан билдәләп ҡуйылған маҡсат тормошҡа ашырыла тип раҫлай торған идеалистик тәғлимәт*)

**ТЕЛЕОПЕРА́ТОР** *м* телеоператор (*телестудия операторы*)

**ТЕЛЕО́ЧЕРК** *м* телеочерк (*телевизион очерк*)

**ТЕЛЕПАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое телепатия ...ы; **телепати́ческая связь** телепатия элемтәһе

**ТЕЛЕПА́ТИЯ** *ж* телепатия (*кеше фекерҙәренең һәм тойғоларының алыҫтан һиҙелеүе тураһында фәнни нигеҙләнмәгән күренеш*)

**ТЕЛЕПЕРЕДА́ТЧИК** *м* телетапшырғыс

**ТЕЛЕПЕРЕДА́ЧА** *ж* телевизион тапшырыу; **смотре́ть телепереда́чу** телевизион тапшырыу ҡарау

**ТЕЛЕПОСТАНО́ВКА** *ж* телепостановка; **пока́зывать телепостано́вку** телепостановка күрһәтеү

**ТЕЛЕПРОГРА́ММА** *ж* телепрограмма (*телевизион программа*)

**ТЕЛЕРЕПОРТА́Ж** *м* телерепортаж; **телерепорта́ж из ко́смоса** йыһандан (тапшырылған) телерепортаж

**ТЕЛЕРЕПОРТЁР** *м* телерепортёр

**ТЕЛЕСВЯ́ЗЬ** *ж* телевизион элемтә

**ТЕЛЕСКО́П** *м* телескоп (**1.** *йондоҙҙарҙы һәм планеталарҙы ҡарай, тикшерә торған махсус ҡоролма* **2.** *зоол. аквариум алтын балыҡтарының бер төрө*)

**ТЕЛЕСКОПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** телескоп ...ы; **телескопи́ческая труба́** телескоп торбаһы **2.** *опт.* телескопик (*ныҡ ҙурайтып күрһәтә торған*)

**ТЕЛЕСКО́ПНЫЙ,** -ая, -ое телескоп ...ы; **телеско́пная труба́** телескоп торбаһы

**ТЕЛЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *физ., мат.* есемле **2.** кәүҙә ...ы, тән ...ы; **теле́сное наказа́ние** тән яҙаһы **3.** (*о цвете*) тән төҫлө, тән төҫөндәге; **чулки́ теле́сного цве́та** тән төҫөндәге ойоҡ

**ТЕЛЕСПЕКТА́КЛЬ** *м* телеспектакль (*телевизион спектакль*)

**ТЕЛЕТА́ЙП** *м* телетайп (*хәрефтәр баҫа торған телеграф аппараты*)

**ТЕЛЕТА́ЙПНЫЙ,** -ая, -ое телетайп ...ы; **телета́йпная ле́нта** телетайп таҫмаһы

**ТЕЛЕУПРАВЛЕ́НИЕ** *с* телемеханика аша идара итеү

**ТЕЛЕУСТАНО́ВКА** *ж* телевизион ҡоролма

**ТЕЛЕФИ́ЛЬМ** *м* телефильм (*телевизион фильм*)

**ТЕЛЕФО́Н** *м* **1.** телефон; **междугоро́дный телефо́н** ҡала-ара телефон; **разгова́ривать по телефо́ну** телефондан һөйләшеү **2.** (*номер телефонного аппарата*) телефон, телефон номеры; **записа́ть телефо́н дру́га** дуҫтың телефонын яҙып алыу ♦ **висе́ть на телефо́не** *разг. см.* **висе́ть**

**ТЕЛЕФОНИЗА́ЦИЯ** *ж* телефон үткәреү, телефонлаштырыу

**ТЕЛЕФОНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* телефон үткәреү, телефонлаштырыу; **телефонизи́ровать кварти́ру** фатирҙы телефонлаштырыу

**ТЕЛЕФОНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что, о чём* телефондан хәбәр итеү

**ТЕЛЕФОНИ́СТ** *м* и **ТЕЛЕФОНИ́СТКА** *ж* телефонсы, телефонда эшләүсе

**ТЕЛЕФОНИ́Я** *ж* телефония (*фәндә телефон бәйләнештәре принциптарын һәм уға кәрәкле ҡоралмалдар эшкәртеү өлкәһе*)

**ТЕЛЕФО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** телефон ...ы; **телефо́нная тру́бка** телефон трубкаһы **2.** телефон аша; **телефо́нный вы́зов** телефон аша саҡыр(т)ыу

**ТЕЛЕФОНОГРА́ММА** *ж* телефонограмма (*телефон аша бирелгән хәбәр*); **получи́ть телефоногра́мму** телефонограмма алыу

**ТЕЛЕ́Ц** *м* **1.** *книжн., уст.* үгеҙ башмаҡ **2.** *астр.* Буға (*йондоҙлоҡ*)

**ТЕЛЕЦЕ́НТР** *м* телеүҙәк (*телевидение үҙәге*)

**ТЕЛЕЭКРА́Н** *м* телевизор экраны

**ТЕЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** быҙаулау; **коро́ва тели́лась** һыйыр быҙауланы **2.** *перен., разг.* мыштырлау, яйлау

**ТЁЛКА** *ж*; *разг.* башмаҡ, тана; (*родившаяся весной — до годовалого возраста*) орғасы башмаҡ; (*родившаяся осенью — до годовалого возраста*) һараяҡ башмаҡ; (*с годовалого возраста до первого отёла*) тана һыйыр; (*не телившаяся до трёхлетнего возраста*) сәңгәсәр тана

**ТЕЛЛУ́Р** *м* теллур (*химик элемент, көмөш төҫлө аҡ кристалл матдә*)

**ТЕ́ЛО** *с* **1.** *физ., мат.* есем; **твёрдые тела́** ҡаты есемдәр; **геометри́ческое те́ло** геометрик есем **2.** (*организм человека и животного*) кәүҙә, тән; **ча́сти те́ла** тән өлөштәре **3.** *воен.* (*ствол орудия*) көбәк; **те́ло ору́дия** туп көбәге ♦ **е́ле-е́ле душа́ в те́ле** *см.* **е́ле-е́ле**

**ТЕЛОГРЕ́ЙКА** *ж*; *разг.* **1.** һырма, телогрейка; **солда́тская телогре́йка** һалдат һырмаһы **2.** еңһеҙ кофта (*ҡатын-ҡыҙ кейеме*)

**ТЕЛОДВИЖЕ́НИЕ** *с* тән хәрәкәте

**ТЕЛО́К** *м*; *разг. см.* **телёнок**

**ТЕЛОРЕ́З** *м* тәнкиҫәр, бысаҡ үлән, бысҡы үлән

**ТЕЛОСЛОЖЕ́НИЕ** *с* тән төҙөлөшө, һын, буй-һын; **челове́к кре́пкого телосложе́ния** буй-һыны ныҡ кеше

**ТЕЛОХРАНИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** *ист.* (*у хана*) үңгәр, нөгәр **2.** шәхси һаҡсы

**ТЕ́ЛЬНИК** *м*; *разг.* эске күлдәк (*матростар күлдәге*)

**ТЕ́ЛЬЦЕ** *с* **1.** *уменьш.-ласк. от* **те́ло** 2; **ху́денькое те́льце** сибек кәүҙә **2.** *обычно мн.* **тельца́**; *биол.* тәнсәләр; **бе́лые кровяны́е тельца́** ҡандың аҡ тәнсәләре

**ТЕЛЯ́ТИНА** *ж* быҙау ите

**ТЕЛЯ́ТНИК** *м* **1.** (*хлев для телят*) быҙау аҙбары, быҙау араны **2.** быҙау ҡараусы

**ТЕЛЯ́ТНИЦА** *ж см.* **теля́тник** 2

**ТЕЛЯ́ЧИЙ,** -ья, -ье **1.** быҙау ...ы; **теля́чьи но́жки** быҙау аяҡтары **2.** быҙау ите ...ы, быҙау итенән бешерелгән; **теля́чьи котле́ты** быҙау итенән бешерелгән котлеттар ♦ **теля́чий восто́рг** *ирон.* урынһыҙға шатланыу; **теля́чьи не́жности** *ирон.* урынһыҙ наҙланыу, сөсөләнеү

**ТЕМ** *частица* **1.** (*употребляется со сравнительной степенью прилагательных и наречий для выражения усиления интенсивности, степени качества*) -раҡ/-рәк; **тем лу́чше** бигерәк яҡшы **2.** (*в составе сложного союза "чем ..., тем"*) (шул тиклем) -раҡ/-рәк; **чем сложне́е де́ло, тем интере́снее** эш ни тиклем ҡатмарлыраҡ, шул тиклем ҡыҙығыраҡ ♦ **тем бо́лее** бигерәк тә; **тем не ме́нее** *см.* **ме́нее**

**ТЕ́МА** *ж в разн. знач.* тема; **ва́жная те́ма** мөһим тема; **раскры́ть те́му** теманы асыу; **те́ма с вариа́циями** *муз.* вариациялы тема

**ТЕМА́ТИКА** *ж* тематика (*темалар системаһы*)

**ТЕМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тематик, тема буйынса; **темати́ческий план** тематик план; **темати́ческая разрабо́тка** тема буйынса эшләү

**ТЕМБР** *м* тембр (*тауыш сифаты*); **тембр го́лоса** тауыш тембры

**ТЕ́МБРОВЫЙ,** -ая, -ое тембр ...ы; **те́мбровые разли́чия инструме́нтов** инструменттарҙың тембр айырмалыҡтары

**ТЕМЕННО́Й,** -ая, -ое түбә ...ы; **теменна́я кость** түбә һөйәге

**ТЕ́МЕНЬ** *ж*; *разг.* ҡараңғылыҡ, ҡараңғы; **кака́я те́мень** ҡалай ҡараңғы

**ТЕМЛЯ́К** *м* бөлдөргө (*ҡылыс, ҡамсы һ.б. һабына тағылған ҡулға кейә торған элмәге*)

**ТЕМНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*становиться тёмным*) ҡарайыу, ҡарая төшөү; **серебро́ темне́ет** көмөш ҡарая **2.** *безл.* (*о наступлении сумерек, вечера*) ҡараңғыланыу, ҡараңғы төшөү; **зимо́й ра́но темне́ет** ҡыш иртә ҡараңғылана **3.** (*видне́ться*) ҡарайып күренеү; **вдали́ темне́ет лес** алыҫта урман ҡарайып күренә ♦ **в глаза́х темне́ет** күҙ алды ҡараңғылана

**ТЕМНЕ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** *безл. см.* **темне́ть** 2; **2.** *см.* **темне́ть** 3

**ТЕМНИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*делать тёмным*) ҡараңғыландырыу **2.** *перен., прост.* (*путать, обманывать*) бутау, алдау

**ТЕМНИ́ЦА** *ж*; *уст., высок.* төрмә, зиндан; **посади́ть в темни́цу** төрмәгә ултыртыу

**ТЕМНО́ 1.** *нареч.* ҡараңғы; **свеча́ темно́ гори́т** шәм ҡараңғы яна **2.** *в знач. сказ., безл.* ҡараңғы; **в глаза́х темно́** күҙ алды ҡараңғы; **на у́лице темно́** урамда ҡараңғы

**ТЕМНО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡара", "ҡуңыр" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.,* **темногла́зый** ҡара күҙле

**ТЁМНО-...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡуйы", "ҡара", "ҡуңыр" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.,* **тёмно-си́ний** ҡуйы күк; **тёмно-зелёный** ҡуйы йәшел

**ТЕМНОБРО́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡара ҡашлы

**ТЕМНОВОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое ҡуңыр сәсле

**ТЕМНОГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое ҡара күҙле

**ТЕМНОКО́ЖИЙ,** -ая, -ее **1.** ҡара тәнле (*кеше*) **2.** *в знач. сущ.* **темноко́жий** *м* и **темноко́жая** *ж* ҡара тәнле кеше

**ТЕМНОЛИ́КИЙ,** -ая, -ое ҡара (ҡуңыр) йөҙлө (битле)

**ТЕМНОЛИ́ЦЫЙ,** -ая, -ее ҡара (ҡуңыр) йөҙлө (битле)

**ТЕМНОТА́** *ж* **1.** ҡараңғылыҡ, ҡараңғы; **ночна́я темнота́** төнгө ҡараңғылыҡ **2.** *перен., разг.* (*невежество*) наҙанлыҡ, томаналыҡ **3.** *перен.* (*неясность*) аңлайышһыҙлыҡ, аныҡһыҙлыҡ

**ТЁМНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡараңғы; **тёмная ко́мната** ҡараңғы бүлмә **2.** (*о цвете*) ҡара, ҡуңыр; **тёмные во́лосы** ҡуңыр сәс **3.** *перен.* (*сомнительный*) шикле, ҡараңғы; **тёмное де́ло** шикле эш **4.** *перен.* (*невежественный*) наҙан, ҡара; **тёмные лю́ди** наҙан кешеләр **5.** *перен.* (*мрачный, безрадостный*) ауыр, ҡайғылы, күңелһеҙ; **тёмные мы́сли** күңелһеҙ уйҙар **6.** *перен.* (*неясный*) билдәһеҙ, аңлайышһыҙ **7.** *перен.* (*злобный*) ҡара, яуыз ♦ **тёмный лес** тулыһынса билдәһеҙ, ҡара урман; **с темна́ до темна́**; **от темна́ до темна́** *прост.* ҡара таңдан ҡара кискә тиклем; **тёмное пятно́** ҡара тап

**ТЕМП** *м* темп (**1.** *музыкаль әҫәрҙең башҡарылған тиҙлеге* **2.** *берәй нәмәнең тормошҡа ашырылыу, тамамланыу тиҙлеге*) ♦ **в те́мпе** йәһәт кенә, тиҙ-тиҙ генә

**ТЕМПЕРА́МЕНТ** *м* темперамент, дәрт, ғәйрәт; **челове́к с темпера́ментом** дәртле кеше

**ТЕМПЕРА́МЕНТНЫЙ,** -ая, -ое темпераментлы, дәртле, ҡыҙыу; **темпера́ментная речь** темпераментлы телмәр

**ТЕМПЕРАТУ́РА** *ж* **1.** температура; **сверхвысо́кая температу́ра** үтә юғары температура; **температу́ра горе́ния** яныу температураһы; **температу́ра плавле́ния** *хим.* ирей температураһы **2.** температура, тән ҡыҙыулығы (эҫелеге); **изме́рить температу́ру** тән ҡыҙыулығын үлсәү

**ТЕМПЕРАТУ́РИТЬ** *несов.*; *разг.* температура күтәрелеү, тәне яныу; **больна́я температу́рит** ауырыуҙың температураһы күтәрелә; **си́льно температу́рит** тәне ныҡ яна

**ТЕМПЕРАТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое температура ...ы, ҡыҙыулыҡ ...ы, йылылыҡ ...ы; **температу́рная крива́я** температура кимәле (үҙгәреше)

**ТЕ́МЯ** *с*; *анат.* түбә, баш түбәһе; **уда́рить по те́мени** түбәгә һуғыу

**ТЕНДЕНЦИО́ЗНОСТЬ** *ж* **1.** (*идейная направленность*) тенденциялылыҡ **2.** (*предвзятость*) тенденциозлыҡ, бер яҡлылыҡ

**ТЕНДЕНЦИО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*идейно направленный*) тенденциялы **2.** (*предвзятый*) тенденциоз, бер яҡлы, объектив булмаған; **тенденцио́зное освеще́ние вопро́са** мәсьәләне бер яҡлы яҡтыртыу

**ТЕНДЕ́НЦИЯ** *ж* **1.** тенденция, үҫеш йүнәлеше; **прогресси́вная тенде́нция** прогрессив үҫеш йүнәлеше **2.** (*основная идея*) төп фекер, төп идея **3.** (*предвзятая идея, навязываемая читателю*) бер яҡлы фекер

**ТЕ́НДЕР** *м* тендер (**1.** *паровозға тағылған һыу йәки күмер запасы тейәлгән вагон* **2.** *бер мачталы хәрби корабль*)

**ТЕНЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** күләгә …ы **2.** *в разн. знач.* күләгәле; **теневы́е места́ в карти́не** картиналағы күләгәле урындар; **теневáя сторонá ýлицы** урамдың күләгәле яғы **3.** *перен.* шәүлә …ы, күләгәле, йәшерен, тиçкәре; **теневáя эконóмика** йәшерен иҡтисад; **тенево́й кабине́т** йәшерен кабинет

**ТЕНЕЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *бот.* күләгә һөйөүсе (*үçемлек*)

**ТЕНЁТА** *мн.*; *прям.*, *перен.* ау, тоҙаҡ; **попа́сть в тенёта** ауға эләгеү; **тенёта би́ржевых опера́ций** биржа операцияһының ауҙары

**ТЕНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** күләгәле, күләгә күп төшә торған; **тени́стый сад** күләгәле баҡса **2.** (*находящийся в тени*) күләгәләге, күләгә төшкән; **тени́стая поля́на** күләгәләге аҡлан

**ТЕ́ННИС** *м* теннис; **игра́ть в те́ннис** теннис уйнау

**ТЕННИСИ́СТ** *м* и **ТЕННИСИ́СТКА** *ж* теннис уйнаусы, теннисcы

**ТЕ́ННИСКА** *ж* тенниска (*ҡыçҡа еңле күлдәк*); **наде́ть те́нниску** тенниска кейеү

**ТЕ́ННИСНЫЙ,** -ая, -ое теннис …ы; **те́ннисный мяч** теннис тубы

**ТЕ́НОР** *м* (*высокий мужской голос и певец с таким голосом*) тенор; **лири́ческий те́нор** лирик тенор; **выступа́ет знамени́тый те́нор** атаҡлы тенор сығыш яһай

**ТЕНТ** *м* тент (*киндер япма*)

**ТЕНЬ** *ж* **1.** күләгә; **тень от де́рева** ағастан төшкән күләгә **2.** (*силуэт*) шәүлә; **мелькну́ла тень** *чья-л.* *кемдеңдер* шәүләһе күренеп ҡалды **3.** *чего*; *перен.* (*отражение внутреннего состояния*) билдә, эҙ; **по лицу́ её пробежа́ла тень неудово́льствия** йөҙөндә ризаһыҙлыҡ билдәһе сағылып китте **4.** *чего*; *перен.* шәүлә, күләгә; **те́ни про́шлого** үткән заман шәүләләре ♦ **держа́ться в тени́** үҙен күрһәтмәй йәшәү, ҡатнашмау, ситтә ҡалыу; **тень па́дает** *на кого кемгә* шик төшә

**ТЕОДОЛИ́Т** *м* теодолит, мөйөш үлсәгес (*геодезияла, астрономияла һ.б. мөйөш билдәләү өсөн ҡулланылған ҡорамал*)

**ТЕОКРА́ТИЯ** *ж* теократия (*сәйәси хакимиәт дин башлыҡтары ҡулында булған идара формаһы*)

**ТЕО́ЛОГ** *м* теолог (*теология белгесе*)

**ТЕОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое теологик; **теологи́ческий труд** теологик хеҙмәт

**ТЕОЛО́ГИЯ** *ж* теология (*Алла хаҡындағы һәм дини белем буйынса тәғлимәт*)

**ТЕОРЕ́МА** *ж*; *мат.* теорема; **доказа́ть теоре́му** теореманы иçбатлау; **теоре́ма Пифаго́ра** Пифагор теоремаһы

**ТЕОРЕТИЗИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** (*заниматься вопросами теории*) теоретик мәсьәләләр менән шөғөлләнеү **2.** (*рассуждать на теоретические темы*) теорияға бирелеү, теория менән мауығыу

**ТЕОРЕ́ТИК** *м* теоретик; **теоре́тики нау́ки** фән теоретиктары

**ТЕОРЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое теоретик; **теорети́ческие вопро́сы** теоретик мәсьәләләр

**ТЕОРЕТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ысынбарлыҡтан алыç, ситләштерелгән

**ТЕО́РИЯ** *ж* **1.** теория, тәғлимәт; **тео́рия позна́ния** танып белеү тәғлимәте **2.** теория; **тео́рия вероя́тностей** ихтималлыҡтар теорияһы; **тео́рия относи́тельности** *физ.* нисбәтлек теорияһы; **тео́рия му́зыки** музыка теорияһы

**ТЕОСО́ФИЯ** *ж* теософия (*дини-идеалистик тәғлимәт*)

**ТЕПЕ́РЕШНИЙ,** -яя, -ее *разг.* хәҙерге, әлеге, ошо; **тепе́решнее вре́мя** ошо ваҡыт

**ТЕПЕ́РЬ** *нареч.* (*сейчас*) хәҙер, әле; **тепе́рь ты погоди́** хәҙер һин көтөп тор

**ТЁПЛЕНЬКИЙ,** -ая, -ое *уменьш.-ласк.* *от* **тёплый** 1; **вы́дался тёпленький денёк** йылы ғына көн тура килде ♦ **тёпленькое месте́чко** *ирон.* йылы урын (*еңел аҡса килә торған*)

**ТЕПЛЕ́ТЬ** *несов.* **1.** йылыныу; **мо́ре тепле́ет** диңгеҙ йылына **2.** *безл.* йылытыу, йылыта төшөү, йылытып ебәреү; **ста́ло тепле́ть** йылыта башланы **3.** *перен.* йылыу, яғымлыланыу; **взгляд её тепле́ет** уның ҡарашы йылына

**ТЕ́ПЛИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*слабо гореть, светиться*) йымылдау, һүнер-һүнмәç кенә янып тороу **2.** *перен.* (*тлеться*) бар; **жизнь едва́ те́плится в нём** уның сыҡмаған йәне генә бар

**ТЕПЛИ́ЦА** *ж* йылытма, теплица; **выра́щивать огурцы́ в тепли́це** теплицала ҡыяр үçтереү

**ТЕПЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йылытма …ы, теплица …ы; **тепли́чная ра́ма** йылытма ҡыçаны **2.** йылытмала (теплицала) үçтерелгән; **тепли́чные огурцы́** йылытмала үçтерелгән ҡыяр ♦ **тепли́чное расте́ние**; **тепли́чный цвето́к** *кто* тормошҡа яраҡлашмаған кеше

**ТЕПЛО́ I** *с* **1.** (*о температуре воздуха, тел и т.д.*) йылылыҡ, йылы; **на у́лице 3 гра́дуса тепла́** тышта 3 градус йылылыҡ **2.** *перен.* (*сердечное, доброе отношение*) йылылыҡ; **душе́вное тепло́** күңел йылылығы **3.** *физ.* *см.* **теплота́**

**ТЕПЛО́ II** **1.** *нареч.* йылы; **оде́ться тепло́** йылы кейенеү **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* йылы; **мне тепло́** миңә йылы; **в ва́ленках нога́м тепло́** быймала аяҡҡа йылы; **на душе́ тепло́** күңелгә йылы ♦ **ни тепло́ ни хо́лодно** *см.* **хо́лодно**

**ТЕПЛО...** *урыç теләндә ҡушма һүҙҙәрҙең "йылы", "йылылыҡ" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәç.*, **теплосе́ть** йылылыҡ селтәре

**ТЕПЛОВО́З** *м* тепловоз; **води́ть теплово́з** тепловоз йөрөтөү

**ТЕПЛОВО́Й,** -ая, -ое *физ.*, *тех.* йылылыҡ …ы, йылылыҡ ярҙамында; **теплова́я эне́ргия** йылылыҡ энергияһы; **теплово́е равнове́сие** йылы-

лыҡ тигеҙләнеше; **теплово́е расшире́ние** йылылыҡ ярҙамында киңәйеү ♦ **теплово́й уда́р** (башҡа) эҫе ҡабыу (тейеү)

**ТЕПЛОЁМКОСТЬ** *ж*; *физ.* йылылыҡ һыйышы, йылы һыйышлыҡ (тотоусанлыҡ); **теплоёмкость печи́** мейестең йылылыҡ һыйышы; **теплоёмкость по́чвы** *с.-х.* тупраҡтың йылы тотоусанлығы

**ТЕПЛОЗАЩИ́ТА** *ж см.* **теплоизоля́ция**

**ТЕПЛОИЗОЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое йылылыҡ үткәрмәй торған; **теплоизоляцио́нный материа́л** йылылыҡ үткәрмәй торған материал

**ТЕПЛОИЗОЛЯ́ЦИЯ** *ж* йылылыҡ үткәрмәү (сығармау)

**ТЕПЛОКРО́ВНЫЕ: теплокро́вные живо́тные** *зоол.* йылы ҡанлылар

**ТЕПЛОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *бот., зоол.* йылы яратыусы, йылыла үҫә торған; **теплолюби́вые культу́ры** йылыла үҫә торған үҫемлектәр

**ТЕПЛОМАГИСТРА́ЛЬ** *ж* йылылыҡ магистрале

**ТЕПЛООБМЕ́Н** *м* йылылыҡ алмашыу

**ТЕПЛООТДА́ЧА** *ж*; *физ., физиол.* йылы биреш, йылы биреү

**ТЕПЛОПРОВО́ДНОСТЬ** *ж*; *физ.* йылы үткәреүсәнлек; **коэффицие́нт теплопрово́дности** йылы үткәреүсәнлек коэффициенты; **теплопрово́дность древеси́ны** ағастың йылылыҡ үткәреүсәнлеге

**ТЕПЛОПРОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *физ.* йылы (йылылыҡ) үткәреүсе; **теплопрово́дные тела́** йылы үткәреүсе есемдәр

**ТЕПЛОСЕ́ТЬ** *ж* йылылыҡ селтәре

**ТЕПЛОСНАБЖЕ́НИЕ** *с* йылы(лыҡ) менән тәьмин итеү

**ТЕПЛОСТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое йылыға сыҙамлы; **теплосто́йкая сталь** йылыға сыҙамлы ҡорос

**ТЕПЛОСТО́ЙКОСТЬ** *ж* йылыға сыҙамлылыҡ

**ТЕПЛОТА́** *ж* **1.** *физ.* йылылыҡ; **едини́ца теплоты́** йылылыҡ берәмеге **2.** *см.* **тепло́** I 1; **люби́ть теплоту́** йылылыҡты яратыу **3.** *перен. см.* **тепло́** I 2; **душе́вная теплота́** күңел йылылығы

**ТЕПЛОТВО́РНОСТЬ** *ж*; *спец.* йылы биреүсәнлек, йылылыҡ биреү һәләте; **теплотво́рность то́плива** яғыулыҡтың йылы биреүсәнлеге

**ТЕПЛОТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое йылылыҡ хасил итә торған, йылы биреү ...ы; **теплотво́рная спосо́бность то́плива** яғыулыҡтың йылы биреү мөмкинлеге

**ТЕПЛОТЕ́ХНИК** *м* теплотехник (*теплотехника белгесе*)

**ТЕПЛОТЕ́ХНИКА** *ж* йылылыҡ техникаһы (*техниканың бер тармағы*)

**ТЕПЛОТРА́ССА** *ж* теплотрасса (*йылылыҡ үткәреүсе трасса*)

**ТЕПЛОУСТО́ЙЧИВЫЙ,** -ая, -ое йылылыҡҡа бирешмәүсән, йылыға сыҙамлы

**ТЕПЛОФИКА́ЦИЯ** *ж* теплофикация (*йылытыу системаһы үткәреү*)

**ТЕПЛОФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* үҙәктән йылытыу (*үҙәктән йылытыу системаһын үткәреү*)

**ТЕПЛОХО́Д** *м* теплоход; **пла́вать на теплохо́де** теплоходта йөҙөү

**ТЕПЛОЦЕНТРА́ЛЬ** *ж* теплоцентраль (*үҙәк йылытыу системаһы*)

**ТЕПЛУ́ШКА** *ж*; *разг.* теплушка (**1.** *йылытылған тауар вагоны* **2.** *стадиондарҙа, төҙөлөштә йылыныу бүлмәһе*)

**ТЁПЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** йылы; **тёплая ко́мната** йылы бүлмә **2.** *перен.* (*сердечный*) йылы, ысын күңелдән; **тёплый приём** йылы ҡабул итеү **3.** күңелгә ятышлы, йылы; **тёплые тона́ кра́сок** буяуҙарҙың йылы тондары ♦ **тёплое месте́чко** *ирон.* йылы урын

**ТЕПЛЫ́НЬ** *ж*; *разг.* йылы, (ныҡ, бик) йылы һауа (көн); **на у́лице теплы́нь** урамда бик йылы

**ТЕПЛЯ́К** *м*; *спец.* тепляк (**1.** *төҙөлөштә ваҡытлыса эшләнгән йылы аласыҡ* **2.** *йәш малды тотоу өсөн йылы аҙбар*)

**ТЕРАПЕ́ВТ** *м* терапевт (*эске ауырыуҙар белгесе*)

**ТЕРАПЕВТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое терапия ...ы, терапевтик; **терапевти́ческое отделе́ние больни́цы** хәстәхананың терапия бүлеге

**ТЕРАПИ́Я** *ж* терапия (**1.** *медицинаның эске ауырыуҙарҙы өйрәнеү һәм дауалау юлдарын эҙләй торған бүлеге* **2.** *дауалау*)

**ТЕРЕБИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тетеү, һелкеү; **тереби́льная маши́на** тетеү машинаһы

**ТЕРЕБИ́ЛЬЩИК** *м* и **ТЕРЕБИ́ЛЬЩИЦА** *ж* киндер (етен) тетеүсе

**ТЕРЕБИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* тетеү, ойпалау, тартҡыслау; **тереби́ть во́лосы** сәсте ойпалау **2.** *с.-х.* тетеү, һелкеү; **тереби́ть лён** етен тетеү **3.** *перен.* (*приставать, надоедать*) йөҙәтеү, бәйләнеп ялҡытыу

**ТЕ́РЕМ** *м* терем (*Боронғо Руста байҙар йортоноң өҫкө өлөшөнә һалынған манара һымаҡ айырым ҡоролма*)

**ТЕРЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* (*растирать, натирать*) ышҡыу, ыуыу, ыуалау; (*о животных*) өйкәү, тызыу; **не три глаза́** күҙеңде ыуалама; **тере́ть спи́ну** арҡаны ышҡыу; **тере́ть рога́** мөгөҙҙө тызыу **2.** *что* (*измельчать*) ваҡлау, ҡырыу; **тере́ть морко́вь** кишер ҡырыу **3.** *что* и *без доп.* (*причинять боль*) ҡырыу, өйкәү, ышҡыу; **сапо́г трёт но́гу** итек аяҡты өйкәй

**ТЕРЕ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *чем*; *разг.* ышҡыныу, һөртөнөү; **тере́ться полоте́нцем** таҫтамал менән ышҡыныу **2.** *обо что* ышҡылыу; **жернова́ тру́тся друг о дру́га** тирмән таштары бер-береһенә ышҡыла **3.** *перен., разг.* (*около, среди кого-чего-л.*) буталып (ҡыҫылып, һырышып) йөрөү; **котёнок трётся у ног** бесәй балаһы аяҡ аҫтында һырышып йөрөй **4.** *страд. от* **тере́ть** 1, 2

**ТЕРЗА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **терза́ть** 1; **2.** *обычно мн.* **терза́ния**; *перен.* ғазап, яфа; **испы́тывать терза́ния ре́вности** көнсөллөк ғазабы кисереү

**ТЕРЗА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** (*рвать на части*) өҙгөләү, өҙгөләп ташлау **2.** *перен.* (*мучить*) йонсотоу, ыҙалатыу, интектереү, ғазаплау, ғазап сиктереү

**ТЕРЗА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** өҙгөләнеү, интегеү, ғазапланыу; **терза́ться сомне́ниями** шик-шөбһәнән ғазапланыу **2.** *страд. от* **терза́ть**

**ТЁРКА** *ж* ҡырғыс; **тере́ть на тёрке морко́вь** ҡырғыста кишер ҡырыу

**ТЕ́РМИН** *м* термин, атама; **техни́ческие те́рмины** техник терминдар

**ТЕРМИНОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое терминология ...ы, терминологик; **терминологи́ческий слова́рь** терминология һүҙлеге

**ТЕРМИНОЛО́ГИЯ** *ж* терминология (*терминдар йыйылмаһы*); **граммати́ческая терминоло́гия** грамматик терминология

**ТЕРМИ́СТ** *м* термист (*металдарҙы термик юл менән эшкәртеүсе*)

**ТЕРМИ́Т I** *м см.* **терми́ты**

**ТЕРМИ́Т II** *м*; *хим.*, *тех.* термит (*янғанда бик юғары температура бирә торған онтаҡ ҡатнашма*)

**ТЕРМИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **терми́т** *м*) термиттар (*зарарлы бөжәктәр*)

**ТЕРМИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое термит; **терми́тная сва́рка** термит менән йәбештереү

**ТЕРМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *спец.* **1.** (*тепловой*) термик; **терми́ческий режи́м** термик режим **2.** термик ысул менән; **терми́ческая обрабо́тка мета́ллов** металдарҙы термик ысул менән эшкәртеү

**ТЕРМО́ГРАФ** *м* термограф (*һауа, һыу һ.б. температураһын бер туҡтауһыҙ яҙып барыусы прибор*)

**ТЕРМОДИНА́МИКА** *ж* термодинамика (*физиканың йылылыҡ тигеҙләнеше һәм уның башҡа төр энергияға әүерелеү закондарын өйрәнә торған бүлеге*)

**ТЕРМО́МЕТР** *м* термометр (*йылылыҡ үлсәгесе*); **измеря́ть температу́ру термо́метром** термометр менән тән ҡыҙыулығын үлсәү

**ТЕРМОМЕ́ТРИЯ** и **ТЕРМОМЕТРИ́Я** *ж* термометрия (*физиканың температураны үлсәү ысулдарын өйрәнә торған бүлеге*)

**ТЕРМООБРАБО́ТКА** *ж* ҡыҙҙырып (термик юл менән) эшкәртеү

**ТЕРМОРЕГУЛЯ́ТОР** *м* йылылыҡ регуляторы, терморегулятор

**ТЕРМОРЕГУЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *физиол.* терморегуляция (*организм йылылығын бер кимәлдә тотоуҙы тәьмин иткән физиологик процестар*)

**ТЕ́РМОС** *м* термос; **нали́ть в те́рмос чай** термосҡа сәй һалыу

**ТЕРМОСТА́Т** *м* термостат (*йылылыҡты бер кимәлдә һаҡлай торған ҡоролма*)

**ТЕРМОТЕРАПИ́Я** *ж*; *мед.* термотерапия (*парафин, ванна һ.б. менән йылытып дауалау*)

**ТЕРМОФИ́ЛЫ** *мн.* (*ед.* **термофи́л** *м*); *зоол.*, *бот.* термофилдар (*бик юғары температурала йәшәй алған организм*)

**ТЕРМОЭЛЕМЕ́НТ** *м*; *спец.* термоэлемент

**ТЕРМОЯ́ДЕРНЫЙ: термоя́дерное ору́жие** термоядролы ҡорал; **термоя́дерная реа́кция** термоядро реакцияһы

**ТЁРН** и **ТЕРН** *м* күгән (*үҫемлеге һәм емеше*)

**ТЕРНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* сәнскеле, шыраулы; **терни́стый куст** сәнскеле ҡыуаҡ **2.** *перен.* ауыр, ҡыйын; **терни́стый путь** ауыр юл

**ТЕРНО́ВНИК** *м см.* **тёрн**

**ТЕРНО́ВЫЙ,** -ая, -ое күгән ...ы; **терно́вый куст** күгән ҡыуағы

**ТЕРПЕЛИ́ВО** *нареч.* түҙем (сабырлыҡ) менән, сабыр ғына; **терпели́во объясня́ть** түҙем менән аңлатыу

**ТЕРПЕЛИ́ВОСТЬ** *ж* түҙем(ле)лек, сыҙам(лы)лыҡ, сабырлыҡ

**ТЕРПЕЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое түҙем(ле), сыҙам(лы), сабыр; **терпели́вый челове́к** түҙемле кеше

**ТЕРПЕ́НИЕ** *с* **1.** түҙемлек, сыҙамлыҡ, тәҡәт; **терпе́ние ло́пнуло** түҙемлек бөттө **2.** (*настойчивость в каком-л. деле*) түҙемлелек, сабырлыҡ, ныҡышмалылыҡ ♦ **терпе́ние и труд всё перетру́т** сабырлыҡтың төбө һары алтын

**ТЕРПЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* (*стойко переносить что-л.*) түҙеү, сыҙау, сабыр итеү; **терпе́ть боль** ауыртыуға сыҙау **2.** *кого-что* (*мириться с наличием*) түҙеү, килешеү, риза булыу; **она́ не те́рпит возраже́ний** ул ҡаршы әйткәнгә түҙмәй **3.** *что* (*испытывать что-л. тяжёлое*) осрау, татыу, күреү; (*поражение*) еңелеү; **терпе́ть нужду́** нужа күреү **5.** (*с отрицанием*) көтөү, туҡтап тороу; **де́ло не те́рпит** эш туҡтап тормай ♦ **бума́га всё те́рпит** ҡағыҙ бөтәһен дә күтәрә, нимә яҙһаң да ярай

**ТЕРПЕ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *кому* и *без доп. безл.* (*с отрицанием*) түҙә алыу, сыҙау, сыҙап булыу; **мне не те́рпится приступи́ть к рабо́те** эшкә тотонмай түҙә алмайым **2.** *страд. от* **терпе́ть**

**ТЕРПИ́МОСТЬ** *ж* түҙемлек, сыҙамлыҡ, түҙеп (сыҙап) тороусанлыҡ ♦ **дом терпи́мости** *уст.* зина йорто

**ТЕРПИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **терпе́ть** **2.** *прил.* түҙерлек, сыҙарлыҡ; **жара́ ещё терпи́ма** эҫелек әле түҙерлек; **терпи́мое положе́ние** түҙерлек хәл **3.** *прил.* (*снисходительный*) түҙемле, сабыр; **терпи́мый челове́к** сабыр кеше

**ТЕ́РПКИЙ,** -ая, -ое теш(те) ҡамаштыра торған, ауыҙ(ҙы) бөрөштөрә торған; **те́рпкое я́блоко** теш ҡамаштыра торған алма

**ТЕРПУ́Г I** *м*; *спец.* терпуг (*игәү урынына ҡулланыла торған эре һырлы ҡорос ҡайраҡ*)

**ТЕРПУ́Г II** *м* терпуг (*Алыҫ Көнсығыш һыуҙары балығы*)

**ТЕРРАКО́ТА** *м* терракота (*яндырылған төҫлө балсыҡ һәм унан эшләнгән әйбер*)

**ТЕРРАКО́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** терракота, терракота ...ы; **террако́товые изде́лия** терракота әйберҙәр **2.** (*о цвете*) ҡыҙылһыу, көрән

**ТЕРРА́РИЙ** и **ТЕРРА́РИУМ** *м* террарий, террариум (*ер-һыу һәм һөйрәлеүсе хайуандарҙы аҫрай торған бина, урын*)

**ТЕРРА́СА** *ж* **1.** терраса (*түбәһе ябыулы өй алды*); **пить чай на терра́се** террасала сәй эсеү **2.** *в знач. нареч.* **терра́сами** киртләс (киртләс-киртләс) булып; **бе́рег спуска́ется терра́сами** яр киртләс-киртләс булып төшә

**ТЕРРЕНКУ́Р** *м*; *мед.* терренкур (*шифаханаларҙа йәйәү йөрөү менән дауалау ысулы һәм шуның өсөн юл*)

**ТЕРРИКО́НИК** и **ТЕРРИКО́Н** *м* терриконик, террикон (*шахта янындағы уба*)

**ТЕРРИТОРИА́ЛЬНО** *нареч.* территориаль, территорияға ҡараған

**ТЕРРИТОРИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое территориаль; **территориа́льное деле́ние** территориаль бүленеш; **территориа́льная це́лостность** территориаль бөтөнлөк ♦ **территориа́льные во́ды** эске һыуҙар (*диңгеҙҙең берәй дәүләткә ҡараған яр буйы һыуҙары*)

**ТЕРРИТО́РИЯ** *ж* территория; **террито́рия страны́** илдең территорияһы; **террито́рия заво́да** завод территорияһы

**ТЕРРО́Р** *м* террор (*сәйәси дошмандарға физик көс ҡулланып ҡурҡытыу*); **фаши́стский терро́р** фашистик террор

**ТЕРРОРИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* **1.** ҡурҡыу аҫтында тотоу, террор менән янау **2.** *разг.* (*запугать*) ҡурҡытыу, ҡотон алыу

**ТЕРРОРИ́ЗМ** *м* террорсылыҡ; **международный террори́зм** халыҡ-ара террорсылыҡ

**ТЕРРОРИ́СТ** *м* и **ТЕРРОРИ́СТКА** *ж* террорсы, террорист

**ТЕРРОРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое террористик, террористар ...ы; **террористи́ческий акт** террористик акт

**ТЕРРОРИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое террорист ...ы, террористар ...ы; **террори́стская гру́ппа** террористар төркөмө

**ТЁРТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **тере́ть** **2.** *прил.* ҡырылған; **тёртая морко́вь** ҡырылған кишер **3.** *в знач. прил.*; *перен.*, *разг.* (*опытный, бывалый — о человеке*) шымарған, йышылған ♦ **тёртый кала́ч** *см.* **кала́ч**

**ТЕРЦЕ́Т** *м*; *муз.* терцет (**1.** *өс башҡарыусынан торған ансамбль* **2.** *ошондай ансамбль өсөн яҙылған музыкаль әҫәр* **3.** *әҙ. сонеттағы өс юллыҡ шиғыр*)

**ТЕРЦИ́НА** *ж*; *лит.* терцина (*ямб менән яҙылып, өс юллыҡтан торған строфа*)

**ТЕ́РЦИЯ** *ж* терция (**1.** *муз. диатоник гамманың өсөнсө баҫҡысы* **2.** *типогр. титул шрифтарының береһе*)

**ТЕРЬЕ́Р** *м* терьер (*һунар, хеҙмәт һәм бүлмә эттәре тоҡомдарының уртаҡ исеме*)

**ТЕРЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* юғалтыу; **теря́ть де́ньги** аҡса юғалтыу **2.** *кого-что*; *перен.* (*лишаться*) юғалтыу, юйыу, яҙыу; **теря́ть друзе́й** дуҫтарҙы юғалтыу; **теря́ть ра́зум** аҡылды юйыу; **теря́ть сон** йоҡонан яҙыу **3.** *в чём* кәметеү, юғалтыу; **теря́ть в ве́се** ауырлыҡты юғалтыу; **теря́ть ско́рость** тиҙлекте кәметеү **4.** *что* (*тратить попусту*) әрәм итеү, юғалтыу; **теря́ть вре́мя** ваҡытты әрәм итеү **5.** *что* (*растрачивать*) тәләфләү; **не теря́ть зерно́** игенде тәләфләмәү ♦ **теря́ть го́лову** баш ҡатыу, башты юғалтыу; **теря́ть по́чву под нога́ми** таянысты (терәкте) юғалтыу; **теря́ть и́з виду** *см.* **вид** I

**ТЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** юғалыу; **кни́га потеря́лась** китап юғалды **2.** (*утрачиваться*) юғалыу, тарҡалыу; **па́мять начала́ теря́ться** зиһен тарҡала башланы **3.** (*становиться менее заметным*) юғалыу; **доро́жка теря́ется во ржи** юл арыш араһына инеп юғала **4.** (*лишаться самообладания*) аптырап ҡалыу, аҡыл (баш) етмәү, ҡаушау, юғалып ҡалыу; **теря́ться пе́ред учи́телем** уҡытыусы алдында ҡаушау; **не теря́ться в беде́** бәлә-ҡаза килгәндә аптырап ҡалмау **5.** *страд. от* **теря́ть** ♦ **теря́ться в дога́дках** *см.* **дога́дка**

**ТЁС** *м собир.* таҡта, йоҡа таҡта; **крыть тёсом** таҡта менән ябыу

**ТЕСА́К** *м* **1.** (*плотничий топор*) юнғыс балта, юнғы, юныу балтаһы **2.** ҡыҫҡа ҡылыс (*ике яғы ла үткер булған*)

**ТЁСАНЫЙ,** -ая, -ое юнылған; **тёсаное де́рево** юнылған ағас

**ТЕСА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* юныу, яндау; **теса́ть бревно́** бүрәнә юныу; **теса́ть топоро́м** балта менән юныу **2.** *что* (*изготовлять тесанием*) юнып эшләү ♦ **хоть кол на голове́ теши́** *см.* **кол**

**ТЕСЁМКА** *ж*; *разг. см.* **тесьма́**

**ТЕСИ́НА** *ж* (бер буй) таҡта, йышылған бер таҡта; **дли́нная теси́на** оҙон бер буй таҡта

**ТЕСЛО́** *с* арҡыры балта, уймыр; **дыря́вить тесло́м** уймыр менән тишеү

**ТЕСНИ́НА** *ж* тарлауыҡ, тар үткәүел

**ТЕСНИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* ҡыҫыу, тығыҙлау; **тесни́ть друг дру́га** бер-береңде ҡыҫыу **2.** *кого-что* (*заставлять отступать*) ҡыҫырыҡлау, ҡыҫырыҡлап сигендереү; **тесни́ть неприя́теля** дошманды ҡыҫырыҡлау **3.** *что* ҡыҫыу, ҡыҫылыу; **тесни́т грудь** күкрәк ҡыҫа, тын ҡыҫыла

**ТЕСНИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** өйкөлөшөү, өйөлөү; **на у́лице тесни́лись лю́ди** урамда халыҡ өйкөлөшә ине **2.** (*толкать, прижимать друг друга в тесноте*) ҡыҫышыу, ҡыҫылышыу **3.** (*ютиться*) ҡыҫылып йәшәү, ҡыҫыҡта тороу **4.** *перен.* (*стремиться проникнуть в душу, сердце — о чувствах, мыслях*) тулыу, ҡайнау **5.** *страд. от* **тесни́ть**

**ТЕ́СНО** **1.** *нареч.* йыш, тығыҙ, ныҡ; **те́сно прижа́ться друг к дру́гу** бер-береңә ныҡ һыйыныу **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* ҡыҫыҡ, ҡыҫынҡы, тығыҙ, тар; **в ваго́не те́сно** вагонда тығыҙ **3.** *кому*

*в знач. сказ.*, *безл.* ҡыҫыҡ, тар; **в плеча́х те́сно** яурыны тар

**ТЕСНОТА́** *ж* ҡыҫынҡылыҡ, тығыҙлыҡ, тарлыҡ; **теснота́ ко́мнаты** бүлмәнең ҡыҫынҡылығы ♦ **в тесно́те да не в оби́де** урын тар булһа ла күңел киң

**ТЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыҫыҡ, тығыҙ, тар; **те́сная ко́мната** тығыҙ бүлмә **2.** (*расположенный близко, вплотную друг к другу*) йыш, тығыҙ; **те́сные ряды́** тығыҙ сафтар **3.** ҡыҫыҡ, тар; **те́сный костю́м** тар костюм; **те́сная о́бувь** ҡыҫыҡ аяҡ кейеме **4.** *перен.* (*близкий*) яҡын, тығыҙ; **те́сная дру́жба** яҡын дуҫлыҡ; **те́сная связь** тығыҙ бәйләнеш **5.** *уст.* (*затруднительный, тяжёлый*) ҡыҫыҡ, ауыр; **те́сные обстоя́тельства** ауыр хәлдәр

**ТЕСО́ВЫЙ,** -ая, -ое таҡта, йоҡа таҡта ...ы; **тесо́вая кры́ша** таҡта ҡыйыҡ

**ТЕСТ** *м*; *псих.* тест (*кеше аңының, аҡылының үҫеш кимәлен, уның башҡа сифаттарын билдәләү маҡсатында үткәрелгән һынау*); **зада́ния те́ста** тест һорауҙары (биремдәре)

**ТЕСТИ́РОВАНИЕ** *с* тест буйынса һынау; **тести́рование студе́нтов** студенттарҙы тест буйынса һынау

**ТЕ́СТО** *с* **1.** ҡамыр; **пре́сное те́сто** сөсө ҡамыр; **те́сто из ржано́й муки́** арыш ҡамыры; **зака́шивать те́сто** ҡамыр әсетеү **2.** *спец.* иҙмә; **известко́вое те́сто** эзбиз иҙмәһе ♦ **из одного́ те́ста** бер ҡалыптан һуғылған

**ТЕСТООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое ҡамыр һымаҡ, ҡамырға оҡшаш; **тестообра́зная ма́сса** ҡамыр һымаҡ масса

**ТЕСТЬ** *м* (*отец жены*) ҡайны, ҡайната; **тёща** *ж* (*мать жены*) ҡәйнә

**ТЕСЬМА́** *ж* (*на подоле платья*) таҫма, ейәк, ҡоршау; (*для подвязывания голенища*) ҡысмау, ҡунысбау; (*у женского платка*) һағалдырыҡ; **обшива́ть тесьмо́й** таҫма һалыу (баҫыу)

**ТЕ́ТЕРЕВ** *м* ҡор; **тетёрка** *ж* инә ҡор, буҙ ҡор; **те́терев-коса́ч** ата ҡор; **охо́та на тетерево́в** ҡор аулау

**ТЕТЕРЕВИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прил.* ҡор ...ы; **тетереви́ный ток** ҡор уйыны **2.** *в знач. сущ.* **тетереви́ные** *мн.*; *зоол.* ҡорҙар, ҡор һымаҡтар

**ТЕТЕ́РЯ: глуха́я тете́ря** һаңғырау тауыҡ; **со́нная тете́ря** йоҡосо (кеше), йоҡо тоҡсайы

**ТЕТИВА́** *ж* кереш (**1.** *уҡ-һаҙаҡта тартҡырыусы бау* **2.** *махс. судноларҙы һ.б. тартыу канаты* **3.** *махс. баҫҡыстың таҡталары һалына торған ҡыя өрлөк*)

**ТЁТКА** *ж* **1.** (*сестра отца или матери — старшая*) инәй; (*младшая*) апай **2.** *прост.* апай, инәй (*үҙеңдән оло ҡатын-ҡыҙға мөрәжәғәт һүҙе*)

**ТЕТРА́ДНЫЙ,** -ая, -ое дәфтәр ...ы; **тетра́дный лист** дәфтәр бите

**ТЕТРА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое дәфтәр ...ы; **тетра́дочная страни́ца** дәфтәр бите

**ТЕТРА́ДЬ** *ж* дәфтәр; **тетра́дь в лине́йку** буйлы дәфтәр; **тетра́дь в кле́тку** шаҡмаҡлы дәфтәр; **тетра́дь для рисова́ния** рәсем дәфтәре

**ТЕТРАЛО́ГИЯ** *ж* тетралогия (*дөйөм фекере буйынса берләштерелгән дүрт әҙәби йәки музыкаль әҫәр*)

**ТЕТРА́ЭДР** *м*; *мат.* тетраэдр (*һәр яғы өсмөйөштән торған дүртҡыр*)

**ТЁТУШКА** *ж*; *ласк.* апаҡай, инәкәй

**ТЁТЯ** *ж*; *разг. см.* **тётка**

**ТЕ́ФТЕЛИ** и **ТЕФТЕ́ЛИ** *мн.* тефтели (*үткәрелгән иттән йомарлап эшләнгән ашамлыҡ*)

**ТЕХ...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "техник" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **техпропага́нда** техник пропаганда

**ТЕХМИ́НИМУМ** *м* (*технический минимум*) техминимум (*техник минимум*)

**ТЕХНА́РЬ** *м*; *разг.* технарь (*техника менән мауығыусы, техника менән эш иткән кеше*)

**ТЕХНИЗА́ЦИЯ** *ж* технизация (*техник саралар менән ҡоралландырыу*)

**ТЕ́ХНИК** *м*; *в разн. знач.* техник; **го́рный те́хник** тау эштәре технигы; **рабо́тать те́хником** техник булып эшләү ♦ **зубно́й те́хник** теш технигы (*теш протездары яһаусы*)

**ТЕ́ХНИКА** *ж*; *в разн. знач.* техника; **передова́я те́хника** алдынғы техника; **вое́нная те́хника** хәрби техника; **убо́рочная те́хника** урып-йыйыу техникаһы; **те́хника спорти́вной игры́** спорт уйыны техникаһы; **овладе́ть те́хникой** техникаға эйә булыу ♦ **те́хника безопа́сности** хәүефһеҙлек техникаһы

**ТЕ́ХНИКУМ** *м* техникум; **строи́тельный те́хникум** төҙөлөш техникумы; **учи́ться в те́хникуме** техникумда уҡыу

**ТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* техник; **техни́ческие культу́ры** техник культуралар; **техни́ческие нау́ки** техник фәндәр; **техни́ческие приёмы** техник алымдар; **техни́ческое образова́ние** техник белем ♦ **техни́ческий реда́ктор** техник редактор (*китап, гәзит һ.б. баҫмаларҙы полиграфик яҡтан биҙәүсе*)

**ТЕХНИ́ЧКА** *ж*; *разг.* техничка, йыйыштырыусы (*ҡатын-ҡыҙ*)

**ТЕХНИ́ЧНОСТЬ** *ж* оҫталыҡ

**ТЕХНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое бик оҫта, техникалы; **техни́чный уда́р** бик оҫта һуғыу

**ТЕХНОКРА́ТИЯ** *ж* технократия (**1.** *юғары квалификациялы белгестәр ҡатламы* **2.** *XX б. социаль-иҡтисади сәйәсәттә хакимиәтте инженер-техник интеллигенцияға бирең фекерен үткәрең*)

**ТЕХНО́ЛОГ** *м* технолог (*технология белгесе*)

**ТЕХНОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** технология ...ы; **технологи́ческий институ́т** технология институты **2.** технологик; **технологи́ческий проце́сс** технологик процесс

**ТЕХНОЛО́ГИЯ** *ж* технология (**1.** *материалдарҙы эшләп сығарыу, эшкәртең юлдары ту-*

*раһындағы фән* **2.** *материалдарҙы эшкәртеү процестары*)

**ТЕХНОРУ́К** *м* (*технический руководитель*) техноруk (*техник етәксе*)

**ТЕХОБСЛУ́ЖИВАНИЕ** *с* техник хеҙмәт күрһәтеү (*автомашиналарҙы ҡарау, йүнәтеү, йыуыу һ.б.*)

**ТЕХОСМО́ТР** *м* (*технический осмотр*) техосмотр (*техник ҡарау*)

**ТЕХПЕРСОНА́Л** *м* (*технический персонал*) техперсонал (*техник персонал*)

**ТЕХРЕ́Д** *м*; *разг.* (*технический редактор*) техред (*техник редактор*)

**ТЕЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **течь** I 1, 3—5; **2.** ағым, ағыш; **тече́ние реки́** йылға ағымы; **бы́строе тече́ние** шәп ағыш; **ве́рхнее тече́ние** үрге ағым; **плыть про́тив тече́ния** ағымға ҡаршы йөҙөү (барыу) **3.** *перен.* (*направление*) ағым, йүнәлеш; **полити́ческое тече́ние** сәйәси ағым; **литерату́рное тече́ние** әҙәбиәттәге йүнәлеш ♦ **в тече́ние** *чего*; *в знач. предлога* эсендә

**ТЕ́ЧКА** *ж* енси теләк (*инә хайуандарҙа*); ҡарығыу (*эттәрҙә, бесәйҙәрҙә һәм кейектәрҙә*); торогоу, ҡасыу (*йорт хайуандарында*)

**ТЕЧЬ I** *несов.* **1.** (*литься, струиться*) ағыу, ағып тороу (ятыу), ҡойолоу; **река́ течёт стреми́тельно** йылға шәп аға; **течь с рёвом** шарлап ағыу; **пот течёт ручьём** тир сорлап аға; **слёзы теку́т из глаз** күҙҙән йәш ҡойола **2.** (*пропускать воду*) ағыу, һыу үтеү; **кры́ша течёт** ҡыйыҡтан һыу үтә; **бак течёт** бак аға **3.** (*проходить, протекать*) ағыу, уҙыу, үтеү; **вре́мя течёт бы́стро** ваҡыт тиҙ уҙа; **жизнь течёт** ғүмер үтә **4.** *перен.* (*идти сплошным потоком*) ағыу, ағылыу; **по у́лицам текла́ наря́дная, весёлая то́лпа** урам буйлап матур кейенгән, шат халыҡ ағыла ине **5.** (*следовать друг за другом*) ағылыу (*һүҙ, уй тураһында*)

**ТЕЧЬ II** *ж* **1.** һыу инә башлау, һыу ағып килеү; **кора́бль дал течь** карапҡа һыу инә башланы **2.** (*отверстие*) (һыу үткәргән) тишек (ярыҡ); **заде́лать течь** һыу үткәргән тишекте ямау, ярыҡты ҡаплау

**ТЁША** и **ТЁШКА** *ж* бауыр ите (*балыҡтың*); **севрю́жья тёшка** уҡбаштың бауыр ите

**ТЕ́ШИТЬ** *несов. кого-что* **1.** *разг.* (*развлекать*) йыуатыу, албырғатыу, күңел асыу **2.** (*успокаивать*) йыуатыу; **те́шить себя́ наде́ждами** өмөт менән йыуаныу

**ТЕ́ШИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** *чем* и *без доп.* (*развлекаться*) албырғау, йыуаныу **2.** *над кем*; *уст.* (*издеваться*) көлөү, мыҫҡыллау

**ТИ́ГЕЛЬ** *м* тигель (**1.** *металл иретә торған утҡа сыҙамлы һауыт* **2.** *типогр. китап баҫыу машинаһындағы металл плита*)

**ТИ́ГЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тигелдә иретелгән (ҡойолған); **ти́гельная сталь** тигелдә ҡойолған ҡорос **2.** *типогр.* тигелле; **ти́гельная печа́тная маши́на** тигелле баҫыу машинаһы

**ТИГР** *м* юлбарыҫ, ата юлбарыҫ; **тигри́ца** *ж* инә юлбарыҫ

**ТИГРЁНОК** *м* юлбарыҫ балаһы

**ТИГРИ́НЫЙ,** -ая, -ое юлбарыҫ ...ы; **тигри́ный след** юлбарыҫ эҙе

**ТИГРО́ВЫЙ,** -ая, -ое юлбарыҫ ...ы; **тигро́вая шку́ра** юлбарыҫ тиреһе

**ТИГРОЛО́В** *м* юлбарыҫ аулаусы

**ТИК I** *м* (тән) тартышыу (*мускулдар тартышыуының бер төрө*); **тик лица́** бит тартышыу

**ТИК II** *м* (*ткань*) тик (*туҡыма төрө*)

**ТИК III** *м* (*дерево*) тик (*ағас*)

**ТИ́КАНЬЕ** *с см.* **ти́кать**; **ти́канье часо́в** сәғәт текелдәүе

**ТИ́КАТЬ** *несов.* текелдәү, тыҡылдау, тек-тек итеп тороу; **часы́ ти́кают** сәғәт текелдәй

**ТИ́КОВЫЙ,** -ая, -ое тик; **ти́ковая оби́вка** тик көплөк

**ТИК-ТА́К** *межд.* (*звукоподражание тиканью часов*) тек-тек

**ТИ́ЛЬДА** *ж* тильда (*тулҡын формаһындағы ҡыҫҡа һыҙыҡ, һүҙҙе ҡабатламау өсөн ҡуйыла*)

**ТИМО́Л** *м* тимол (*эфир майҙарынан алына торған кристаллик матдә*)

**ТИМОФЕ́ЕВКА** *ж* тимофеевка, ебәләй (*башаҡ ебәрә торған ҡыяҡ культура*)

**ТИМПА́Н I** *м* тимпан (*литавра һымаҡ боронғо музыка ҡоралы*)

**ТИМПА́Н II** *м*; *архит.* тимпан (*тәҙрә, ишек өҫтөнә эшләнгән аркалы уйым*; *фронтондың биҙәкле яғы*)

**ТИМУ́РОВЦЫ** *мн.* (*ед.* **тиму́ровец** *м*) тимурсылар; **пионе́ры-тиму́ровцы** тимурсы пионерҙар

**ТИМЬЯ́Н** *м* ҡанүлән, кейәү үләне

**ТИ́НА** *ж* ләм, лай, туйын

**ТИ́НИСТЫЙ,** -ая, -ое ләмле, лайлы, ләм баҫҡан; **ти́нистое дно о́зера** ләмле күл төбө

**ТИП** *м* **1.** (*модель, форма*) тип, төр; **тип хозя́йства** хужалыҡ тибы; **ти́пы предложе́ний** һөйләм төрҙәре **2.** *биол.* тип; **тип беспозвоно́чных** умыртҡаһыҙҙар тибы **3.** *лит.* (*художественный образ*) тип; **тип геро́я в литерату́ре** әҙәбиәттә герой тибы **4.** *разг. пренебр.* (*человек странных, отрицательных свойств*) тип, әҙәм; **заба́вный тип** ирмәк әҙәм **5.** (*категория людей*) кеше; **люде́й тако́го ти́па я не люблю́** ундай кешеләрҙе мин яратмайым **6.** *в знач. предлога с род. п.* **ти́па** шикелле, кеүек, тибында

**ТИПА́Ж** *м* типаж; **я́ркий типа́ж** сағыу типаж; **типа́ж самолётов** самолёттар типажы

**ТИПИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** *спец.* типлаштырыу, типтар буйынса классификациялау; **типиза́ция почв** тупраҡтарҙы типлаштырыу **2.** типиклаштырыу; **типиза́ция о́бразов** образдарҙы типиклаштырыу

**ТИПИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** *спец.* типлаштырыу; **типизи́ровать произво́дство маши́н** машиналар етештереүҙе типлаштырыу **2.** ти-

пиклаштырыу; **типизи́ровать литерату́рный о́браз** әҙәби образды типиклаштырыу

**ТИПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *лит.*, *иск.* типик; **типи́ческий о́браз** типик образ **2.** *см.* **типи́чный**; **типи́чные явле́ния** типик күренештәр

**ТИПИ́ЧНОСТЬ** *ж* типиклыҡ, типик булыу, ғәҙәти булыу

**ТИПИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** типик, үҙенә бер төрлө; **типи́чный го́лос** типик тауыш **2.** (*часто встречающийся*) типик, ғәҙәттәге; **типи́чная оши́бка** типик хата; **типи́чный слу́чай** типик хәл

**ТИПОВО́Й,** -ая, -ое **1.** типовой, типлаштырылған; **типово́й прое́кт шко́лы** мәктәптең типовой проекты **2.** (*стандартный*) өлгө; **типова́я ме́бель** өлгө йыһаз (ҡаралты); **типовы́е пра́вила** өлгө ҡағиҙәләр

**ТИПОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *уст.* типография …ы; **типографи́ческий стано́к** типография станогы

**ТИПОГРА́ФИЯ** *ж* типография, баҫмахана

**ТИПОГРА́ФСКИЙ,** -ая, -ое типография …ы, басмахана …ы

**ТИПОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое типологик; **типологи́ческие разли́чия** типологик айырымлыҡтар

**ТИПОЛО́ГИЯ** *ж* типология (*төрлө типтағы әйберҙәрҙең йәки күренештәрҙең классификацияһы*)

**ТИПУ́Н** *м* тилсә (*коштар ауырыуы*: *тел осона сыҡҡан кимерсәк*) ♦ **типу́н (тебе́) на язы́к** телеңә тилсә сыҡҡыры, ауыҙыңдан ел алһын (*яраман һүҙ һөйләгән кешегә ҡарата*)

**ТИПЧА́К** *м* бүтәгә (*үлән*)

**ТИР** *м* тир; **стреля́ть в ти́ре** тирҙа атыу

**ТИРА́ДА** *ж* тирада (*күтәренке тонда әйтелгән оҙон һүҙ*)

**ТИРА́Ж I** *м* (*розыгрыш выигрышей в займе, лотерее*) тираж ♦ **вы́йти в тира́ж** тираждан сығыу, иҫкереү

**ТИРА́Ж II** *м* (*количество экземпляров печатающегося издания*) тираж; **тира́ж кни́ги** китаптың тиражы

**ТИРАЖИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *что* **1.** (*размножать*) күпләп баҫтырыу **2.** (*устанавливать тираж*) тиражын ҡуйыу

**ТИРА́Н** *м* **1.** *ист.* тиран (*Боронғо Грециялағы һәм XII—XVI бб. Италиялағы хаким*) **2.** (*жестокий правитель*) тиран, залим (*көслөк менән хакимлыҡты алған кеше*) **3.** *перен.* залим, ҡаты бәғерле, яуыз кеше

**ТИРА́НИТЬ** *несов.* *кого-что* йәберләү, яфалау, ғазаплау; **тира́нить наро́д** халыҡты йәберләү

**ТИРАНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое залими, залимана; **тирани́ческий пригово́р** залими хөкөм

**ТИРАНИ́Я** *ж* **1.** *ист.* залимлыҡ, тиранлыҡ (*идара итеү ысулы*) **2.** (*жестокость, произвол*) йәбер, золом, залимлыҡ **3.** *прям.*, *перен.* (*деспотия*) иҙгенлек; **тирани́я привы́чек** ғәҙәт иҙгенлеге

**ТИРА́НСТВО** *с*; *разг.* иҙгенлек, залимлыҡ, йәбер; **терпе́ть тира́нство** йәбергә сыҙап тороу

**ТИРА́НСТВОВАТЬ** *несов.*; *разг.* залимлыҡ (тиранлыҡ) итеү, иҙгенлек эшләү

**ТИРЕ́** *с нескл.* һыҙыҡ, тире; **поста́вить тире́** һыҙыҡ ҡуйыу

**ТИРКУ́ШКА** *ж* көйөлдө (*дала ҡошо*)

**ТИС** *м* тис (*йылы яҡтағы ылыҫлы ағас*)

**ТИ́СКАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что*; *разг.* (*сжимать*) ҡыҫыу, ҡыҫҡылау **2.** *прост.* (*нажимая, запихивать куда-л.*) тыҡҡылау (*ҡыҫып*); **ти́скать ве́щи в чемода́н** әйберҙәрҙе сумаҙанға тыҡҡылау **3.** *что*; *типогр.* (*отпечатывать с помощью печатного пресса*) (яҙыуҙы) баҫыу, баҫмаға төшөрөү

**ТИСКИ́** *мн.* **1.** *тех.* ҡыҫтырғыс; **зажа́ть дета́ль в тиски́** деталде ҡыҫтырғысҡа ҡыҫтырыу **2.** *воен.* (*охват с двух сторон*) ҡыҫым; **взять врага́ в тиски́** дошманды ҡыҫымға алыу **3.** *чего*; *перен.* ҡыҫыу, иҙеү; **вы́рваться из тиско́в нужды́** ҡытлыҡ иҙеүенән ҡотолоу

**ТИСНЕ́НИЕ** *с* **1.** (*действие*) баҫып биҙәкләү, баҫып төшөрөү (*соҡорлап йәки ҡалҡытып*) **2.** (*тиснёный узор*) баҫып төшөрөлгән биҙәк

**ТИСНЁНЫЙ,** -ая, -ое биҙәге баҫып төшөрөлгән, баҫып яҙылған; **тиснёный переплёт** биҙәге баҫып төшөрөлгән китап тышы

**ТИ́СНУТЬ** *сов.* **1.** *см.* **ти́скать** 1; **2.** *см.* **ти́скать** 2, 3

**ТИТА́Н** *м*; *в разн. знач.* титан; **тита́н нау́ки** фән титаны; **добыва́ть тита́н** *хим.* титан табыу; **нали́ть во́ду в тита́н** титанға һыу ҡойоу

**ТИТАНИ́Т** *м* титанит (*үтә күренмәле йәшел аҫыл таш*)

**ТИТАНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое бөйөк, хайран ҙур, ғәжәп бөйөк

**ТИТА́НОВЫЙ,** -ая, -ое титан …ы, титанлы; **тита́новые ру́ды** титанлы мәғдәндәр

**ТИТР** *м* **1.** титр (*кинофильм кадрындағы аңлатма яҙыуҙар*) **2.** *хим.* иҙелмә концентраты

**ТИ́ТУЛ** *м* **1.** титул (*феодал һәм буржуаз йәмғиәттә маҡтаулы, биләмәле исем*); **ти́тул гра́фа** граф титулы **2.** исем, титул; **ти́тул чемпио́на** чемпион исеме **3.** *полигр.* (*заглавие и первая страница книги*) титул; **офо́рмить ти́тул** титул биҙәү

**ТИТУЛОВА́ТЬ** *сов.*, *несов.* *кого* исемләү, титуллау

**ТИ́ТУЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *полигр.* титул …ы; **ти́тульный лист** титул бите ♦ **ти́тульные спи́ски** *эк.* титул исемлеге

**ТИФ** *м* тиф, ҡара һарҡау; **брюшно́й тиф** ҡорһаҡ тифы; **возвра́тный тиф** ҡайтмалы тиф; **сыпно́й тиф** сабыртмалы тиф

**ТИФЛОПЕДАГО́ГИКА** *ж* тифлопедагогика (*дефектологияның һуҡыр һәм ярым һуҡыр балаларҙы уҡытыу бүлеге*)

**ТИФО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тиф …ы; **тифо́зная эпиде́мия** тиф эпидемияһы **2.** тифлы, тиф менән; **тифо́зный больно́й** тиф менән ауырыусы

**ТИ́ХИЙ,** -ая, -ое **1.** аҡрын, әкрен; **ти́хий го́лос** аҡрын тауыш **2.** (*безмолвный*) тыныс, тымыҡ; **ти́хая ночь** тымыҡ төн **3.** (*спокойный*) тыныс, шым; **ти́хая жизнь** тыныс тормош **4.** (*смирный*) баҫалҡы, йыуаш, шым; **ти́хий ребёнок** йыуаш бала **5.** (*медленный*) яй, аҡрын; **ти́хий ход** аҡрын йөрөш ♦ **ти́хий час** *см.* **час**

**ТИ́ХО 1.** *нареч.* аҡрын, шым, яй; **ти́хо войти́** шым инеү; **говори́ть ти́хо** аҡрын һөйләү; **сиде́ть ти́хо** шым ултырыу **2.** *в знач. сказ., безл.* (*о погоде*) тымыҡ; **сего́дня ти́хо** бөгөн тымыҡ

**ТИХОМО́ЛКОМ** *нареч.*; *разг.* **1.** (*тихо*) шым (ғына), аҡрын (ғына), тауышһыҙ-тынһыҙ **2.** (*тайком*) шыпырт (ҡына), һиҙҙермәйенсә (генә), шым (ғына); **подойти́ тихомо́лком** һиҙҙермәйенсә янына килеү

**ТИХО́НЬКО** *нареч.*; *разг. см.* **ти́хо** 1

**ТИХО́НЯ** *м* и *ж*; *разг.* йыуаш (мыштым, баҫалҡы) кеше; **прики́нуться тихо́ней** йыуаш кеше булып ҡыланыу

**ТИХООКЕА́НСКИЙ,** -ая, -ое Тымыҡ океан ...ы; **Тихоокеа́нский флот** Тымыҡ океан флоты

**ТИХОХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое аҡрын йөрөй торған, аҡрын (яй) йөрөшлө; **тихохо́дный парохо́д** аҡрын йөрөшлө пароход

**ТИ́ШЕ 1.** *сравн. ст. от* **ти́хий** и **ти́хо**; **е́хать ти́ше** аҡрыныраҡ барыу **2.** *повел.* сеү, аҡрын, шауламағыҙ; **ти́ше, не меша́йте** сеү, ҡамасауламағыҙ ♦ **ти́ше воды́, ни́же травы** *см.* **вода́**

**ТИШИНА́** *ж* тынлыҡ, һиллек, тыныслыҡ; **глубо́кая тишина́** тәрән тынлыҡ; **погружа́ться в тишину́** тынлыҡҡа сумыу; **наруша́ть тишину́** тыныслыҡты боҙоу

**ТИШКО́М** *нареч.*; *прост.* **1.** (*тихо*) шым (ғына), аҡрын (ғына) **2.** (*тайком*) шым (ғына), һиҙҙермәйенсә (генә), шыпырт (ҡына)

**ТИШЬ** *ж* **1.** *см* **тишина́**; **лесна́я тишь** урман тынлығы **2.** (*тихая, безветренная погода*) һиллек, тынлыҡ ♦ **тишь да гла́дь (да бо́жья благода́ть)** *см.* **гладь** I

**ТКА́НЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** туҡымалы, туҡыма ...ы, туҡыманан эшләнгән **2.** *биол.* туҡыма ...ы; **тка́невое дыха́ние** туҡыма һулышы ♦ **тка́невая терапи́я** *мед.* дауалау ысулы

**ТКА́НЫЙ,** -ая, -ое һуғылған, туҡылған, туҡып (һуғып) яһалған; **тка́ная ска́терть** һуғылған ашъяулыҡ; **тка́ный узо́р** туҡылған биҙәк

**ТКАНЬ** *ж* **1.** туҡыма; **шерстяна́я ткань** йөн туҡыма; **шёлковая ткань** ебәк туҡыма; **пло́тная ткань** беше туҡыма **2.** *биол.* туҡыма; **соедини́тельная ткань** тоташтырғыс тукыма; **му́скульная ткань** мускул туҡымаһы **3.** *чего, какая*; *перен.* (*основа, содержание чего-л.*) нигеҙ, туҡыма, йөкмәтке; **ткань повествова́ния** хикәйәләү нигеҙе

**ТКАНЬЁ** *с* **1.** *см.* **ткать 2.** (*то, что выткано*) туҡыма әйбер

**ТКАНЬЁВЫЙ,** -ая, -ое туҡылған, туҡыманан эшләнгән; **тканьёвое одея́ло** туҡылған одеял

**ТКАТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* һуғыу, туҡыу; **ткать полотно́** киндер һуғыу; **ткать узо́рами** биҙәкләп һуғыу **2.** *что* (*о насекомых*) үреү; **пау́к ткёт паути́ну** үрмәкес ау үрә

**ТКА́ЦКИЙ,** -ая, -ое туҡыу ...ы; **тка́цкий стано́к** туҡыу станогы; **тка́цкий цех** туҡыу цехы

**ТКАЧ** *м* и **ТКАЧИ́ХА** *ж* туҡыусы

**ТКА́ЧЕСТВО** *с* туҡыусылыҡ

**ТКЕМА́ЛИ** *ж нескл.* алса (*сливаның бер төрө*)

**ТКНУТЬ** *сов.* **1.** *см.* **ты́кать** I; **2.** *что*; *разг.* (*поместить, определить*) тығып ебәреү, тығыу; **го́ды я ду́мала — куда́ его́ ткнуть** йылдар буйы уны ҡайҙа тығырға тип уйланым

**ТКНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **ты́каться**

**ТЛЕН** *м*; *книжн.* **1.** (*тление*) серек, серегән нәмә **2.** мәңгелек түгел, фани нәмә; **де́ньги — тлен** аҡса — фани нәмә

**ТЛЕНИЕ** *с см.* **тлеть**

**ТЛЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* фани; **тле́нный мир** фани донъя

**ТЛЕТВО́РНОСТЬ** *ж*; *книжн.* **1.** серегәнлек **2.** *перен.* зарарлылыҡ, боҙолғанлыҡ

**ТЛЕТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* **1.** (*губительный*) үлемесле, һәләкәтле **2.** *перен.* зарарлы, зыянлы; **тлетво́рное влия́ние** зыянлы тәьҫир

**ТЛЕТЬ** *несов.* **1.** (*гнить*) сереү, муртайыу; **наво́з тле́ет** тиреҫ серей **2.** (*слабо гореть*) быҫҡыу, быҫҡып яныу, көйрәү; **сыры́е дрова́ тле́ют** сей утын быҫҡып яна **3.** *перен.* һүнмәү, һаҡланыу, беленеү; **в се́рдце тле́ет наде́жда** күңелдә өмөт сатҡыһы һүнмәй

**ТЛЯ** *ж* кебләһ, бет (*үләндең, ағастың һ.б.*); **я́блоневая тля** алма бете; **зла́ковая тля** ҡыяҡлылар кебләһе; **тля жи́молостная** айыу баланы бете

**ТМИН** *м* аҡ әнис, ҡырағай әнис (*үҫемлеге һәм орлоғо*)

**ТМИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҡ әнис ...ы; **тми́нные семена́** аҡ әнис орлоғо **2.** аҡ әнискә төнәтелгән; **тми́нная во́дка** аҡ әнискә төнәтелгән араҡы

**ТО I** *союз разд.-перечисл.* (*употребляется для соединения предложений или однородных членов при перечислении*) бер ..., бер; берсә ..., берсә; йә ..., йә; әле ..., әле; **ого́нь то разгора́лся, то затуха́л** ут бер яна, бер һүнә ине; **то оди́н, то друго́й** әле береһе, әле икенсеһе ♦ **то и де́ло** *см.* **де́ло**; **не то** юғиһә; **и то** етмәһә

**ТО II** *с мест. см.* **тот**

**-ТО** *частица* **1.** *выделит.* (*употребляется для подчёркивания и выделения в предложении слова, к которому относится*) нәҡ, тап; **тебя-то мне и ну́жно** тап һин кәрәк тә миңә **2.** *неопр.* -дыр/-дер, -тыр/-тер, -ҙыр/-ҙер, -лыр/-лер; **кто́-то** кемдер; **како́й-то** ниндәйҙер; **отку́да-то** ҡайҙандыр

**ТОВА́Р** *м*; *в разн. знач.* тауар; **произво́дство това́ров** тауар етештереү; **това́ры широ́кого потребле́ния** киң ҡулланыу тауарҙары; **това́р сапога́** итек тауары

**ТОВА́РИЩ** *м* **1.** (*по работе*) иптәш; (*в пути*) иптәш, иш, юлдаш; (*у жениха на свадьбе*) нөгәр **2.** (*друг*) дуҫ **3.** (*гражданин страны — обычно при обращении*) иптәш; **това́рищ Дау́тов** Дауытов иптәш ♦ **това́рищ по несча́стью** бер үк бәләгә дусар булған кеше

**ТОВА́РИЩЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** иптәштәрсә, иптәшлек; **това́рищеское отноше́ние** иптәштәрсә мөнәсәбәт **2.** *спорт.* иптәштәрсә; **това́рищеская встре́ча шахмати́стов** шахматсыларҙың иптәштәрсә осрашыуы ♦ **това́рищеский суд** иптәштәр суды

**ТОВА́РИЩЕСТВО** *с* **1.** иптәшлек; **чу́вство това́рищества** иптәшлек хисе **2.** (*организация, артель*) ширҡәт; **това́рищество по совме́стной обрабо́тке земли́** ерҙе бергәләп эшкәртеү ширҡәте

**ТОВА́РНОСТЬ** *ж*; *эк.* тауарлылыҡ; **това́рность се́льского хозя́йства** ауыл хужалығының тауарлылығы; **това́рность ле́са** урмандың тауарлылығы

**ТОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тауар ...ы; **това́рный по́езд** тауар поезы; **това́рный знак** тауар тамғаһы (*тауарға йәки ҡабына һалына торған билдә*) **2.** *эк.* һатыу өсөн билдәләнгән, тауарлыҡлы; **това́рное зерно́** һатыу өсөн билдәләнгән иген

**ТОВАРОВЕ́Д** *м* товаровед (*тауар белгесе*)

**ТОВАРОВЕ́ДЕНИЕ** *с* товароведение (*сауҙа әйбере булыуы йәһәтенән тауарҙы өйрәнеү белеме*)

**ТОВАРООБМЕ́Н** *м* тауар алмашыу

**ТОВАРООБОРО́Т** *м* тауар әйләнеше

**ТОВА́РО-ПАССАЖИ́РСКИЙ,** -ая, -ое тауар һәм пассажирҙар йөрөтә торған; **това́ро-пассажи́рский по́езд** тауар һәм пассажирҙар йөрөтә торған поезд

**ТОВАРОПРОИЗВОДИ́ТЕЛЬ** *м*; *эк.* тауар етештереүсе (эшләп сығарыусы)

**ТО́ГА** *ж* тога (*боронғо римдарҙың өҫкө кейеме, ғәҙәттә аҡ йөндән*) ♦ **ряди́ться в то́гу** *книжн.* булып күренергә тырышыу

**ТОГДА́** *нареч.* **1.** (*не сейчас*) ул саҡта, ул ваҡытта, шул саҡта; **тогда́ мне бы́ло шестна́дцать лет** ул ваҡытта миңә ун алты йәш ине **2.** (*в таком случае*) улайһа, улай булғас; **ты уста́ла? Тогда́ отдохни́!** арыныңмы? Улайһа ял ит! **3.** (*после*) шунан, унан һуң; **они́ ушли́, тогда́ я сел занима́ться** улар китте, шунан мин уҡырға ултырҙым **4.** (*с союзами "когда" и "если"*) -ҡас/-кәс, шунан, унан; **когда́ он отказа́лся, тогда́ я реши́л де́йствовать оди́н** ул баш тартҡас, мин бер үҙем эшләргә булдым ♦ **тогда́ как:** 1) *союз противит.* киреһенсә; 2) *союз уступ.* шуға ҡарамаҫтан, гәрсә

**ТОГДА́ШНИЙ,** -яя, -ее *разг.* ул саҡтағы (ваҡыттағы), шул саҡтағы

**ТОГО́** и **ТОВО́** *частица*; *прост.* **1.** (*заполняет паузу в речи*) ҡара; **уж ты, того́, постара́йся** һин инде, ҡара, тырыштыр **2.** *в знач. сказ.* (*для обозначения каких-л. нарушений в психике человека*) аҡылға еңел; (*о пьяном человеке*) ҡыҙмаса; **он совсе́м того́** ул бөтөнләй аҡылға еңел **3.** *в знач. сказ.* (*с отрицанием "не" в значении "плохой", "неважный"*) шәптән түгел; **вид у тебя́ не того́** һинең ҡиәфәтең шәптән түгел; **мне не того́... нехорошо́ как бу́дто** *безл.* хәлем шәптән түгел

**ТО́ ЕСТЬ** *союз* и *частица* **1.** *союз. поясн.* (*употребляется для пояснения высказанной мысли в значении "а именно"*) йәғни; **э́то бы́ло вчера́, то́ есть в понеде́льник** был кисә, йәғни дүшәмбе көн булды **2.** *союз. поясн.* (*присоединяет предложения или члены предложения, уточняющие высказанную мысль в значении "вернее", "говоря точнее"*) дөрөҫөрәге **3.** *частица* (*для выражения удивления, недоумения и т.п.*) йәғни мәҫәлән; **я не е́ду. — То́ есть, как не е́дешь?** мин бармайым. — Йәғни мәҫәлән, нисек инде бармайһың?

**ТОЖДЕ́СТВЕННОСТЬ** и **ТОЖЕ́СТВЕННОСТЬ** *ж* оҡшашлыҡ, тигеҙлек, берҙәйлек

**ТОЖДЕ́СТВЕННЫЙ** и **ТОЖЕ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое берҙәй, оҡшаш, бер тигеҙ; **тожде́ственный слу́чай** оҡшаш хәл

**ТО́ЖДЕСТВО** и **ТО́ЖЕСТВО** *с* **1.** (*полное сходство*) берҙәйлек, тиңлек, оҡшашлыҡ; **то́ждество взгля́дов на жизнь** тормошҡа ҡараш(тар) берҙәйлеге **2.** *мат.* тигеҙлек; **зако́н то́ждества** тигеҙлек законы; **то́ждества сокращённого умноже́ния** ҡыҫҡаса ҡабатлау тигеҙлектәре

**ТО́ЖЕ** *нареч.* и *частица* **1.** *нареч.* шулай уҡ, да/дә, шул уҡ; **она́ то́же уе́хала** ул да киткән **2.** *частица*; *разг.* (*при выражении неодобрения*) шул, (шулай) уҡ, тағы, да/дә; **а ты то́же хоро́ш!** һин дә килешкәнһең инде! **3.** *частица*; *прост.* (*при переходе к новой теме разговора, связанной с предыдущими*) тағы (ла)

**ТОК I** *м* **1.** (*течение*) ағым, ағыш; **ток во́здуха** һауа ағымы **2.** *физ.* ток; **переме́нный ток** алмаш ток; **ток высо́кой частоты́** ҙур йышлыҡлы ток; **постоя́нный ток** даими ток; **включа́ть ток** токты тоташтырыу

**ТОК II** *м* ырҙын, ырҙын табағы; **рабо́тать на току́** ырҙында эшләү; **механизи́рованный ток** механизацияланған ырҙын табағы

**ТОК III** *м* **1.** *см.* **токова́ть 2.** уйнау урыны (*коштарҙың*)

**ТОКА́РНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* токарлыҡ эше менән шөғөлләнеү, токарь булып эшләү

**ТОКА́РНЫЙ,** -ая, -ое ҡырыу, токарлыҡ; **тока́рный стано́к** ҡырыу станогы; **тока́рное де́ло** токарлыҡ эше

**ТО́КАРЬ** *м* токарь, ҡырыусы (*эшсе, оҫта*); **то́карь-автома́тчик** автоматсы токарь; **то́карь по мета́ллу** металл буйынса токарь

**ТОКОВА́НИЕ** *с см.* **токова́ть**

**ТОКОВА́ТЬ** *несов.* гөрләшеү, гөлдөрләү, уйнау (*ҡайһы бер ҡоштарҙың, мәҫ., ҡорҙарҙың, күгәрсендәрҙең ҡауышҡан ваҡытта сығарған тауыштары*)

**ТОКОВИ́ЩЕ** *с см.* **ток** III 2

**ТОКОПРИЁМНИК** *м* ток алғыс

**ТОКСИКО́З** *м*; *мед.* токсикоз (*дауамлы ағыуланыу*); **пищево́й токсико́з** аҙыҡ токсикозы (*ашамлыҡ аша ағыуланыу*)

**ТОКСИКО́ЛОГ** *м* токсиколог (*токсикология белгесе*)

**ТОКСИКОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое токсикологик, токсикология ...ы

**ТОКСИКОЛО́ГИЯ** *ж* токсикология (*медицинаның ағыуҙарҙы өйрәнеү бүлеге*)

**ТОКСИКОМА́НИЯ** *ж*; *мед.* токсикомания (*ваҡытлыса иҫертеүсе ҡайһы бер ағыулы матдәләрҙе даими рәүештә ҡабул итергә ынтылыу*)

**ТОКСИ́Н** *м*; *биол.*, *мед.* токсин (*микроорганизмдар тарафынан эшләп сығарыла һәм ауырыуға сәбәп була торған ағыулы матдә*)

**ТОКСИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *биол.*, *мед.* **1.** ағыулы, ағыулай торған; **токси́ческие вещества́** ағыулы матдәләр **2.** токсин тәьҫирендә; **токси́ческое пораже́ние не́рвной систе́мы** нервы системаһының токсин тәьҫирендә зарарланыуы

**ТОКСИ́ЧНОСТЬ** *ж*; *биол.*, *мед.* ағыулылыҡ, ағыулы булыуы; **токси́чность га́за** газдың ағыулылығы

**ТОКСИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *биол.*, *мед.* ағыулаусан, ағыулай торған

**ТОЛ** *м* тол (*шартлатҡыс матдә*)

**ТО́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое толь, толдән эшләнгән; **то́левая кры́ша** толь ҡыйыҡ

**ТОЛИ́КА: ма́лая толи́ка** аҙ-маҙ, бер аҙ

**ТОЛК** *м* **1.** *разг.* (*смысл*) мәғәнә, рәт, йүн; **не доби́ться то́лку** рәтен тапмау; **говори́ть без то́лку** мәғәнәһеҙ һөйләү **2.** *обычно мн.* **то́лки** (*пересуды*) имеш (төрлө) хәбәр, имеш-мимеш; **хо́дят ра́зные то́лки** төрлө хәбәрҙәр йөрөй **3.** *разг.* (*польза*) файҙа, рәт, эш; **из неё бу́дет толк** унан рәт сығыр ♦ **знать толк** рәтен белеү; **сби́ться с то́лку** баш ҡатыу

**ТОЛКА́НИЕ** *с см.* **толка́ть** 1, 2

**ТОЛКА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** этеү, төртөү, этеп (төртөп) ебәреү; **толка́ть теле́гу** арбаны этеү **2.** (*в спорте*) ташлау, ырғытыу; **толка́ть ядро́** йәҙрә ташлау **3.** *на что*, *к чему* и *с неопр.*; *перен.* һөйрәү, этәреү; **толка́ть на преступле́ние** енәйәт эшләргә этәреү ♦ **толка́ть в про́пасть** һәләкәткә этеү

**ТОЛКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** төртөшөү, этешеү; **не толка́йтесь!** төртөшмәгеҙ! **2.** *перен.*, *разг.* (*быть где-л. без цели, без дела*) һеҙәнләү, (эшһеҙ) тик йөрөү **3.** (*сталкиваясь, ударяться*) бәрелеү, һуғылыу **4.** *разг.* этеү, этеп инергә тырышыу; **толка́ться в дверь** ишекте этеп инергә тырышыу **5.** *страд. от* **толка́ть**

**ТОЛКА́Ч** *м* **1.** *ж.-д.* эткес (*поезды этеп бара торған ярҙамсы локомотив*) **2.** *мор.* (*буксирное судно*) этеүсе **3.** *перен. разг.* этәреүсе, этеүсе (*берәй эште тиҙләтеүсе кеше*)

**ТОЛКНУ́ТЬ** *сов. см.* **толка́ть** 2, 3; **толкну́ть на преступле́ние** енәйәткә этәреү

**ТОЛКОВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **толкова́ть** 1; **толкова́ние зако́нов** закондарға аңлатма биреү **2.** (*объяснение*) аңлатма, төшөндөрмә; **дать но́вое толкова́ние** *чему-л.* *берәй нәмәгә* яңы аңлатма биреү

**ТОЛКОВА́ТЕЛЬ** *м* аңлатыусы, аңлатып биреүсе (*кеше*)

**ТОЛКОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* (*истолковывать*) аңлатыу, аңғартыу, аңлатма (мәғәнә) биреү; **толкова́ть слова́ в словаре́** һүҙлектә һүҙҙәрҙе аңлатыу **2.** *кому* (*разъяснять*) төшөндөрөү; **ско́лько ни толку́й — он всё равно́ не поймёт** күпме генә төшөндөрһәң дә ул барыбер аңламаҫ **3.** *разг.* (*разговаривать*) һөйләшеү, һөйләү; **толкова́ть о дела́х** эштәр тураһында һөйләшеү; **что и толкова́ть** һөйләп тораһы ла юҡ

**ТОЛКО́ВО** *нареч.*; *разг.* аҡыллы, мәғәнәле

**ТОЛКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* (*разумный*, *дельный*) аҡыллы, башлы, төплө; **толко́вый челове́к** аҡыллы кеше **2.** *разг.* (*ясный*, *понятный*) аңлайышлы, асыҡ; **толко́вое разъясне́ние** аңлайышлы төшөндөрөү; **толко́вый отве́т** асыҡ яуап **3.** аңлатмалы; **толко́вый слова́рь** аңлатмалы һүҙлек

**ТО́ЛКОМ** *нареч.*; *разг.* **1.** аңлатып, рәтләп, яйлап; **скажи́те то́лком** аңлатып әйтегеҙ **2.** (*серьёзно*) ысынлап, йүнләп **3.** (*хорошенько, как следует*) рәтләп, йүнләп; **то́лком ничего́ не уме́ла** йүнләп бер нәмә лә белмәй ине

**ТОЛКОТНЯ́** *ж*; *разг.* этеш-төртөш, бәрелеш-һуғылыш, тығылыш, ығы-зығы

**ТОЛКУ́ЧКА** *ж*; *прост.* **1.** *см.* **толка́ться** **2.** (*барахолка*) баҙар

**ТОЛМА́Ч** *м*; *уст.* тәржемәсе

**ТОЛОКНО́** *с* һоло талканы, талкан (*ашамлыҡ*)

**ТОЛОКНЯ́НКА** *ж* талкан емеш, эт еләге (*аҡһыл-ҡыҙыл сәскәле, ҡыҙыл емешле күп йыллыҡ ярым ҡыуаҡ үҫемлек*)

**ТОЛОКО́ННЫЙ,** -ая, -ое талкан ...ы ♦ **толоко́нный лоб** *прост.* тиле, аңра

**ТОЛО́ЧЬ** *несов. что* төйөү, онтау, ваҡлау; **толо́чь соль** тоҙ төйөү ♦ **толо́чь во́ду в сту́пе** *см.* **вода́**

**ТОЛО́ЧЬСЯ** *несов.*; *разг.* һеҙәнләү, эшһеҙ тик йөрөү, тапанып тороу; **толо́чься на одно́м ме́сте** бер урында тапанып тороу

**ТОЛПА́** *ж* **1.** төркөм, халыҡ; **толпа́ люде́й** халыҡ төркөмө; **собрала́сь толпа́** халыҡ (төркөмө) йыйылды **2.** *в знач. нареч.* **толпо́й** бөтәһе бергә, бергәләп, өйкөлөшөп; **стоя́ть толпо́й** өйкөлөшөп тороу **3.** *кого в знач. сказ.*; *разг.* (*множество*) бихисап, иҫәпһеҙ; **мужчи́н о́коло неё — толпа́** уның тирәһендә ирҙәр — бихисап

**ТОЛПИ́ТЬСЯ** *несов.* йыйылыу, тупланыу, өйкөлөшөү; **наро́д толпи́тся на пло́щади** майҙанға халыҡ йыйылған

**ТОЛСТЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *прост.* бик йыуан (ҡалын); **толсте́нная кни́га** бик ҡалын китап; **толсте́нное бревно́** бик йыуан бүрәнә

**ТОЛСТЕ́ТЬ** *несов.* йыуанайыу, ҡалынайыу, һимереү

**ТОЛСТИ́ТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* йыуанайтыу, ҡалынайтыу, йыуан (ҡалын) күрһәтеү

**ТОЛСТОБРЮ́ХИЙ,** -ая, -ое *прост.* йыуан ҡорһаҡлы

**ТОЛСТО́ВКА** *ж*; *разг.* толстовка (*билдән быумалы киң ирҙәр блузаһы*)

**ТОЛСТОКО́ЖИЙ,** -ая, -ее **1.** ҡалын тиреле (ҡабыҡлы); **толстоко́жий арбу́з** ҡалын ҡабыҡлы ҡарбуз **2.** *перен.*, *разг.* туң, ҡалын тиреле; **толстоко́жий челове́к** ҡалын тиреле кеше

**ТОЛСТОНО́ГИЙ,** -ая, -ое йыуан аяҡлы

**ТОЛСТОПУ́ЗЫЙ,** -ая, -ое *прост.* йыуан (күпкәк) ҡорһаҡлы

**ТОЛСТОСТЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое ҡалын, ҡалын стеналы; **толстосте́нный сосу́д** ҡалын һауыт

**ТОЛСТОСУ́М** *м*; *прост.* аҡса тоғо (*бай*, *ҡалын кеҫәле кеше*)

**ТО́ЛСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о круглых предметах*) йыуан; (*о плоских предметах*) ҡалын; **то́лстая кни́га** ҡалын китап; **то́лстое де́рево** йыуан ағас **2.** йыуан; **то́лстые но́ги** йыуан аяҡтар; **прие́хал то́лстый Пустяко́в** йыуан Пустяков килде ♦ **то́лстый журна́л** ҡалын журнал; **то́лстая кишка́** *анат.* йыуан эсәк

**ТОЛСТЯ́К** *м*; *разг.* йыуан ир кеше; **толсту́ха** *ж*; *разг.* йыуан ҡатын-ҡыҙ

**ТОЛЧЁНЫЙ,** -ая, -ое онтаҡ, онталған; **толчёное стекло́** онталған быяла

**ТОЛЧЕЯ́** *ж* **1.** *см.* **толкотня́** **2.** (*мельница ударного действия*) ваҡлағыс (урғыс) тирмән; **парова́я толчея́** парҙа эшләгән тирмән **3.** (*волнение на море*, *реке*) һыу тулҡынланыу

**ТОЛЧО́К** *м* **1.** һелкенеү, төртөү, тетрәү; **си́льный толчо́к** көслө (ныҡ) төртөү; **подзе́мный толчо́к** ер тетрәү **2.** *перен.* (*побуждение*) этәргес, сәбәп; **толчо́к в рабо́те** берәй эште эшләргә сәбәп **3.** *спорт.* күтәреү; **толчо́к пра́вой руко́й** уң ҡул менән күтәреү

**ТО́ЛЩА** *ж* ҡалынлыҡ, йыуанлыҡ, ҡалын ҡатлам

**ТОЛЩИНА́** *ж* (*о плоских предметах*) ҡалынлыҡ; (*о круглых предметах*) йыуанлыҡ; **толщина́ стен** стеналарҙың ҡалынлығы

**ТОЛЬ** *м* толь (*ябыу материалы*)

**ТО́ЛЬКО** *нареч.*, *частица* и *союз* **1.** *частица огранич.* (*не более как*, *всего лишь*) бары, ни бары, ғына/генә; **э́то то́лько нача́ло** был башы ғына әле; **ей то́лько пять лет** уға бары биш кенә йәш **2.** *союз временной* (*употребляется для присоединения придаточного предложения времени*) -ғас та/-гәс тә; **как то́лько вы́пал снег, мы отпра́вились на охо́ту** ҡар яуғас та, беҙ һунарға сыҡтыҡ **3.** *союз противит.* (*соединяет предложения, из которых одно выражает несоответствие тому, о чём говорится в другом*) ләкин, тик; **хорошо́ зимо́й в лесу́, то́лько хо́лодно** ҡыш көнө урманда яҡшы, ләкин һыуыҡ **4.** *частица усил.* (*выражает пожелание*, *предположительную возможность*) ғына/генә, -һаң/-һәң ине; **то́лько бы не опозда́ть** һуңламаһаҡ ҡына ярар ине; **то́лько бы попа́сть на э́ту ле́кцию** ошо лекцияға эләкһәң ине **5.** *нареч.* (*ещё*, *пока ещё*) ғына/генә әле; **э́то то́лько нача́ло** был башы ғына әле **6.** *нареч.* (*едва*) әле генә, көскә; **то́лько прие́хала, а уже́ тя́нет домо́й** әле генә килгәйнем, өйгә ҡайтҡы ла килә ♦ **то́лько и всего́** шул ғына; **то́лько что** яңы ғына

**ТОМ** *м* том; **рома́н в четырёх тома́х** дүрт томлы роман

**ТОМАГА́ВК** *м*; *этн.* томагавк (*Төньяҡ Америка индеецтарының һуғыш ҡоралы*)

**ТОМА́Т** *м* томат; **ба́нка тома́тов** *спец.* бер банка томат; **купи́ть тома́т** томат һатып алыу

**ТОМА́ТНЫЙ,** -ая, -ое томат ...ы; **тома́тный сок** томат һуты

**ТОМИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое зарыҡтырғыс, ялҡытҡыс, талыҡтырғыс; **томи́тельные мину́ты** зарыҡтырғыс минуттар

**ТОМИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* зарыҡтырыу, интектереү, талыҡтырыу; **не томи́те ребёнка** баланы зарыҡтырмағыҙ **2.** *что* быҡтырыу, быҡтырып бешереү; **томи́ть мя́со** ит быҡтырыу **3.** *что*; *тех.* ҡыҙҙырып йомшартыу; **томи́ть сталь** ҡоросто ҡыҙҙырып йомшартыу **4.** *спец.* томалап тотоу; **томи́ть таба́к** тәмәкене томалап тотоу (*тәмәке әҙерләгәндә*)

**ТОМИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** интегеү, яфаланыу, ғазапланыу; **томи́ться в нево́ле** тотҡонлоҡта интегеү **2.** тилмереү, зарығыу; **томи́ться тоско́й** һағыштан зарығыу **3.** бығып бешеү (*ит һ.б.*) **4.** *страд. от* **томи́ть** 2—4

**ТОМЛЕ́НИЕ** *с* **1.** (*мучение*, *страдание*) яфа, ғазап **2.** *спец. см.* **томи́ть** 3, 4, **томи́ться** 3

**ТОМЛЁНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* быҡтырылған, быҡтырып бешерелгән; **томлёное мя́со** быҡтырып бешерелгән ит

**ТО́МНОСТЬ** *ж* моңһоулыҡ, һығышлылыҡ; **то́мность взгля́да** ҡараштың моңһоулығы

**ТО́МНЫЙ,** -ая, -ое моңһоу, һағышлы; **то́мный взор** һағышлы ҡараш

**ТОМПА́К** *м* томпак (*баҡыр менән цинк ҡатыш иретмә*, *еҙҙең бер төрө*)

**ТОМПА́КОВЫЙ,** -ая, -ое томпак; **томпа́ковое кольцо́** томпак балдаҡ

**ТОН** *м* **1.** *физ.*, *муз.* (*звук определённой высоты*) тауыш, тон; **ни́зкий тон** түбән тауыш; **взять то́ном вы́ше** юғарыраҡ тонды алыу **2.** (*оттенок речи*) тауыш; **повы́сить тон** тауышты күтәреү **3.** (*цвет*, *окраска*, *оттенок цвета*) тон, төҫтәр, буяу; **све́тлые тона́** асыҡ төҫтәр; **карти́на напи́сана в тёмных тона́х** рәсем тоноҡ төҫтәрҙә төшө-

рөлгән **4.** *мед.* йөрәк тибеү тауышы (*йөрәк эшмәкәрлегенән килгән тауыш*) **5.** (*стиль поведения*) мөғәмәлә, үҙеңде тотоу; **хоро́ший тон** үҙеңде яҡшы тота белеү ♦ **зада́ть тон** *см.* **зада́ть**; **попа́сть в тон** яйын (көйөн) табыу

**ТОНА́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** *муз.* тоналлек; **тона́льность до мажо́р** до мажор тоналлеге **2.** *муз.* (*регистр голоса*) тауыш; **высо́кая тона́льность** юғары тауыш **3.** *иск.* өҫтөн төҫ, тоналлек; **тона́льность карти́ны** картинаның тоналлеге

**ТОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тон ...ы, буяу ...ы, төҫ ...ы **2.** *муз., иск.* тональ

**ТОНЗИЛЛИ́Т** *м*; *мед.* тонзиллит (*миндаль биҙҙәренең шешеүе*)

**ТОНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *физиол.* хәл кертеү, тонусты күтәреү

**ТОНИЗИ́РУЮЩИЙ,** -ая, -ее көс биреүсе, тонусты күтәреүсе; **тонизи́рующий напи́ток** тонусты күтәреүсе эсемлек

**ТОНИ́ЧЕСКИЙ I,** -ая, -ое *лит.* тоник (*баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙең сиратлашып килеүенә нигеҙләнгән шиғыр төҙөлөшө*)

**ТОНИ́ЧЕСКИЙ II,** -ая, -ое *физиол.* тонуслы, тонусҡа ҡағылышлы; **тони́ческий рефле́кс** тонуслы рефлекс

**ТО́НКИЙ,** -ая, -ое **1.** йоҡа, нәҙек; **то́нкая тетра́дь** йоҡа дәфтәр; **то́нкий слой** йоҡа ҡатлам; **то́нкие па́льцы** нәҙек бармаҡтар **2.** (*высокий — о звуке*) нәҙек, сәңгел; **то́нкий го́лос** нәҙек тауыш **3.** нескә, нәфис; **то́нкий за́пах** нескә еҫ **4.** үткер, нескә; **то́нкий кри́тик** үткер тәнҡитсе; **то́нкий ю́мор** нескә юмор **5.** (*учтивый*) әҙәпле, нәзәкәтле; **то́нкое обраще́ние** нәзәкәтле мөғәмәлә **6.** (*о чертах лица*) нәфис **7.** (*чуткий*) үткер, һиҙгер; **то́нкий слух** һиҙгер ҡолаҡ ♦ **то́нкая кишка́** *анат.* нәҙек эсәк; **кишка́ тонка́** *см.* **кишка́**

**ТОНКОВОЛОКНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое нәҙек сүсле; **тонковолокни́стый хло́пок** нәҙек сүсле мамыҡ

**ТОНКОКО́ЖИЙ,** -ая, -ее йоҡа ҡабыҡлы (тиреле); **тонкоко́жий плод** йоҡа ҡабыҡлы емеш

**ТОНКОНО́ГИЙ,** -ая, -ое нәҙек аяҡлы

**ТОНКОРУ́ННЫЙ,** -ая, -ое нәҙек йөнлө; **тонкору́нная овца́** нәҙек йөнлө һарыҡ

**ТОНКОСЛО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое йоҡа ҡатламлы, йоҡа

**ТОНКОСТВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое нәҙек көбәкле (*мылтыҡ*); нәҙек олонло (*ағас*)

**ТОНКОСТЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое йоҡа стеналы (быялалы, тимерле, ҡалайлы), йоҡа; **тонкосте́нный сосу́д** йоҡа һауыт

**ТО́НКОСТЬ** *ж* **1.** йоҡалыҡ, нәҙеклек, нескәлек; **то́нкость волокна́** сүстең нәҙеклеге **2.** (*вкуса, запаха и т.п.*) нескәлек, тәмле еҫлелек **3.** (*учтивость*) нәзәкәтлелек **4.** (*чувствительность*) зирәклек, һиҙгерлек, үткерлек **5.** *мн.* **то́нкости** (*подробности*) ентеклелек, нескәлек; **вдава́ться в то́нкости** ентекләп тикшереү ♦ **до то́нкостей** бөтә нескәлектәренә тиклем, энәһенән ебенә тиклем

**ТОНКОШЁРСТНЫЙ** и **ТОНКОШЁРСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** нәҙек (ваҡ) йөнлө (*һарыҡ*) **2.** (*из тонкой шерсти*) нәҙек йөндән эшләнгән; **тонкошёрстное сукно́** нәҙек йөндән эшләнгән буҫтау

**ТОНМЕ́ЙСТЕР** *м* тонмейстер (*телевидениеның, радиотапшырыуҙарҙың һ.б. тауышының дөрөҫ яҙылыуын күҙәтеүсе хеҙмәткәр*)

**ТО́ННА** *ж* тонна; **ве́сом в две то́нны** ике тонна ауырлыҡта

**ТОННА́Ж** *м* тоннаж (**1.** *диң. судноларҙың тонна иҫәбе менән ауырлығы йәки күләме* **2.** *махс. вагон һәм автомобилдәрҙең тонналап йөк күтәрә алыусанлығы* **3.** *махс. тонналап продукция эшләп сығарыу*)

**ТОННЕ́ЛЬ** *м см.* **тунне́ль**

**ТО́НУС** *м* тонус

**ТОНУ́ТЬ** *несов.* **1.** батыу; **де́рево в воде́ не то́нет** ағас һыуҙа батмай; **кора́бль то́нет** карап бата **2.** *в чём* (*вязнуть, утопать*) батыу, сумыу; **тону́ть в снегу́** ҡарҙа батыу; **тону́ть в грязи́** бысраҡҡа батыу **3.** *перен.* (*становиться невидимым*) сумыу, сумып ултырыу, күмелеү; **дома́ то́нут в зе́лени садо́в** йорттар баҡса йәшеллегенә күмелә

**ТОНЧА́ТЬ** *несов.*; *разг.* йоҡарыу, нәҙегәйеү, йоҡара (нескәрә) төшөү

**ТО́НЬШЕ** *нареч.* нескәрәк

**ТО́НЯ** *ж*; *рыб.* (*участок для лова рыбы неводом*) тартым (*йылым ташлап балыҡ тотҡан урын*)

**ТОП** и **ТОП-ТО́П** *межд.* **1.** (*звукоподражание шуму шагов*) тып-тып **2.** *в знач. сказ.*; *разг.* тибеү, тибеп ҡуйыу; **топ ного́й** аяҡ тибеп ҡуйыу

**ТОПА́З** *м* топаз, һары яҡут (*аҫыл таш*)

**ТОПА́ЗОВЫЙ,** -ая, -ое топаз, һары яҡут, һары яҡут ...ы, топаз ...ы; **топа́зовый пе́рстень** һары яҡут ҡашлы йөҙөк

**ТО́ПАНЬЕ** *с см.* **то́пать**

**ТО́ПАТЬ** *несов.* **1.** тапылдатыу, аяҡ тибеү **2.** *прост.* (*идти, ходить вообще*) барыу, китеү, китә биреү; **то́пать на́до** барырға кәрәк

**ТОПИНАМБУ́Р** *м* топинамбур (*үҫемлек*)

**ТОПИ́ТЬ I** *несов. что* **1.** яғыу, тоҡандырыу; **топи́ть печь** мейес яғыу **2.** (*обогревать*) йылытыу; **топи́ть кварти́ру** фатирҙы йылытыу

**ТОПИ́ТЬ II** *несов. кого-что* **1.** (*заставлять тонуть*) батырыу, сумырыу; **топи́ть неприя́тельские суда́** дошман караптарын батырыу **2.** *что* баҫыу; **вода́ то́пит берега́** һыу ярҙарҙы баҫа **3.** *перен., разг.* (*губить*) харап (һәләк) итеү

**ТОПИ́ТЬ III** *несов. что* **1.** иретеү, ҡыҙҙырыу; (*о сале*) һыҙыу, һыҙҙырыу; **топи́ть ма́сло** май иретеү **2.** ҡайнатыу; **топи́ть молоко́** һөт ҡайнатыу

**ТОПИ́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** яныу; **печь то́пится** мейес яна **2.** (*отапливаться*) яғылыу; **э́тот дом давно́ не то́пится** был йорт күптән яғылмай **3.** *страд. от* **топи́ть** I

**ТОПИ́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** һыуға батыу, батып үлеү, һыуға ташланыу **2.** *страд. от* **топи́ть** II

**ТОПИ́ТЬСЯ III** *несов.* **1.** иреү; **воск то́пится** балауыҙ ирей **2.** ҡайнау; **молоко́ то́пится** һөт ҡайнай **3.** *страд. от* **топи́ть** III

**ТО́ПКА** *ж* **1.** *см.* **топи́ть** I; **2.** мейес (ауыҙы), усаҡ яғыу урыны; **парово́зная то́пка** паровоз мейесе

**ТО́ПКИЙ,** -ая, -ое батҡыл, һаҙлыҡлы; **то́пкое ме́сто** батҡыл урын

**ТОПЛЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иреткән, иретелгән; **топлёное ма́сло** иретелгән май **2.** ҡайнатҡан, ҡайнатылған, бешкән; **топлёное молоко́** ҡайнатылған һөт

**ТО́ПЛИВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яғыулыҡ ...ы; **то́пливный газ** яғыулыҡ газы **2.** яғыулыҡ менән; **то́пливное снабже́ние** яғыулыҡ менән тәьмин итеү

**ТО́ПЛИВО** *с* яғыулыҡ; **жи́дкое то́пливо** шыйыҡ яғыулыҡ; **твёрдое то́пливо** ҡаты яғыулыҡ; **ди́зельное то́пливо** дизель яғыулығы

**ТОПЛЯ́К** *м*; *спец.* утыпшы, батҡан ағас

**ТО́ПНУТЬ I** *сов. см.* **то́пать** 1

**ТО́ПНУТЬ II** *несов.*; *прост. см.* **тону́ть**

**ТОПО́ГРАФ** *м* топограф (*топография белгесе*)

**ТОПОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое топография ...ы, топографик; **топографи́ческая ка́рта** топографик карта ♦ **топографи́ческая анато́мия** топографик анатомия (*анатомияның ағзалар урынлашыуын һәм уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтен өйрәнә торған бүлеге*)

**ТОПОГРА́ФИЯ** *ж* топография (**1.** *геодезияның ер өҫтөн үлсәй, планға төшөрә торған бүлеге* **2.** *айырым урындарҙың ер өҫтө төҙөлөшө* **3.** *айырым урындарҙың ер өҫтө төҙөлөшөн планға һәм картаға төшөрөү ысулы*)

**ТО́ПОЛЕВЫЙ** и **ТОПОЛЁВЫЙ,** -ая, -ое тирәк ...ы; **то́полевый пух** тирәк мамығы

**ТОПОЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое тирәк ...ы; **тополи́ный лист** тирәк япрағы

**ТОПОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое топологик; **тополоѓическое простра́нство** топологик аралыҡ

**ТОПОЛО́ГИЯ** *ж* топология (*математиканың бер өлкәһе*)

**ТО́ПОЛЬ** *м* тирәк; **серебри́стый то́поль** аҡ тирәк; **посади́ть тополя́** тирәк ултыртыу; **то́поль чёрный** күк тирәк

**ТОПОНИ́МИКА** *ж* топонимика (**1.** *берәй илдең, урындың географик атамалар йыйылмаһы* **2.** *лингв. ономастиканың географик атамаларҙы өйрәнеү бүлеге*); **топони́мика Башкортоста́на** Башҡортостан топонимикаһы

**ТОПОНИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое топонимия ...ы, топонимик; **топоними́ческие иссле́дования** топонимик тикшеренеүҙәр

**ТОПОНИ́МИЯ** *ж*; *лингв. см.* **топони́мика** 2

**ТОПО́Р** *м* балта; **о́стрый топо́р** үткер балта; **руби́ть топоро́м** балта менән сабыу ♦ **(хоть) топо́р ве́шай** күҙ асҡыһыҙ төтөн

**ТОПО́РИК** *м*; *уменьш. от* **топо́р**; **тури́стский топо́рик** туристар балтаһы

**ТОПОРИ́ЩЕ** *с* (*рукоятка топора*) балта һабы

**ТОПО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** балта ...ы **2.** тупаҫ, килбәтһеҙ, йәмһеҙ; **топо́рная рабо́та** тупаҫ эш

**ТОПО́РЩИТЬ** *несов.* тырпайтыу, ҡарпайтыу, өрпәйтеү, ҡабартыу; **топо́рщить во́лосы** сәсте өрпәйтеү

**ТОПО́РЩИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** тырпайыу, тырпайтыу; **усы́ топо́рщились** мыйыҡтары тырпайҙы **2.** тырпайыу, өрпәйеү, (йөнөн) ҡабартыу; **ко́шка топо́рщится** бесәй йөнөн ҡабарта **3.** *перен.* (*упрямиться*) киреләнеү, тырпайыу

**ТО́ПОТ** *м* аяҡ тауышы, тапылдау; (*копыт*) тояҡ тауышы; **ко́нский то́пот** ат тояғы тауышы

**ТОПОТА́ТЬ** *несов.*; *разг.* тап-топ итеү, тапылдау

**ТОПТА́НИЕ** *с см.* **топта́ть**, **топта́ться**; **топта́ние на ме́сте** бер урында тапанып тороу

**ТОПТА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*мять, давить*) тапау; **топта́ть траву́** үләнде тапау **2.** *что*; *разг.* (*пачкать*) тапау, тапап бысратыу; **топта́ть пол** иҙәнде тапау **3.** *что*; *разг.* (*стаптывать обувь*) туҙҙырыу, кейеп туҙҙырыу; **топта́ть сапоги́** итекте туҙҙырыу **4.** *спец.* (*давить, разминать*) тапау, йомшартыу; **топта́ть гли́ну** балсыҡ тапау **5.** *прост.* (*о спаривании птиц*) тапау (*ҡоштар һөйөшкәндә*) ♦ **топта́ть в грязь** бысраҡ (ҡара) яғыу, мәсхәрә (мыҫҡыл) итеү

**ТОПТА́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** тапаныу, тапанып тороу, алмаш-тилмәш баҫҡылау, тыпырсыныу; **топта́ться у воро́т** ҡапҡа төбөндә тапаныу **2.** (*бесцельно ходить*) файҙаһыҙға (бушҡа) йөрөү, һәптәнләү, йөрөнөү **3.** *страд. от* **топта́ть** ♦ **топта́ться на ме́сте** эше алға бармау, бер урында тапаныу

**ТОПЧА́Н** *м* һике, урындыҡ

**ТОПЫ́РИТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** (*топорщить*) тырпайтыу, ҡарпайтыу, ҡабартыу, өрпәйтеү **2.** тырпайтыу; **топы́рить па́льцы** бармаҡтарҙы тырпайтыу

**ТОПЫ́РИТЬСЯ** *несов.*; *прост.* япрайыу, өрпәйеү, өлтәйеп (тырпайып) тороу (*сәс, йөн һ.б.*)

**ТОПЬ** *ж* батҡыл, һаҙамыҡ урын

**ТО́РБА** *ж*; *прост.* мөшкә, торба (*ат моронона кейҙерелә торған һоло тоҡсайы*) ♦ **носи́ться как с пи́саной то́рбой** артыҡ иғтибар биреү

**ТОРГ I** *м* **1.** *см.* **торгова́ть** 1; **устро́ить торги́** һатыу ойоштороу **2.** *уст.* (*аукцион*) торғы; **прода́ть с торго́в** торғы менән һатыу **3.** *спец.* торг (*берәй эште арзанырак эшләргә килешкән кешегә подряд биреү*)

**ТОРГ II** *м* торг (*сауҙа идаралығы*); **торг по прода́же хле́ба** икмәк һатыу буйынса торг

**ТОРГА́Ш** *м*; *разг.*, **1.** ваҡ сауҙагәр, алыпһатар (*ваҡ-төйәк нәмә һатыусы*) **2.** *перен.*, *пренебр.* арҡа һөйәкһеҙ кеше, намыҫын һатыусы

**ТОРГА́ШЕСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** ваҡ сауҙагәр ...ы, ваҡ сауҙагәрҙәргә хас; **торга́шеские зама́шки** ваҡ сауҙагәрҙәргә хас ҡыланыштар

2. (*стяжательский*) хирес (*үҙ файҙаһын ғына ҡайғыртҡан*)

**ТОРГА́ШЕСТВО** с; *разг.* **1.** (*торговля*) ваҡ сауҙагәрлек **2.** (*стремление к наживе*) хиреслек

**ТОРГОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *кем-чем, с кем-чем* и *без доп.* һатыу итеү, сауҙа итеү, һатыу; **торгова́ть с други́ми стра́нами** башҡа илдәр менән сауҙа итеү; **учи́ться торгова́ть** һатыу итергә өйрәнеү **2.** *кем-чем*; *перен.* һатыу, аҡсаға һатыу, һатылыу; **торгова́ть свое́й со́вестью** намыҫты аҡсаға һатыу **3.** (*быть открытым для торговли*) һатыу итеү, асыҡ булыу; **магази́н торгу́ет с восьми́ часо́в** магазин сәғәт һигеҙҙән һатыу итә **4.** *кого-что*; *прост.* (*договариваться о цене*) һатыулашыу; **торгова́ть коня́** ат һатыулашыу

**ТОРГОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*сговариваться о цене*) һатыулашыу, сауҙалашыу; **торгова́ться с продавцо́м** һатыусы менән һатыулашыу **2.** *перен., разг.* (*спорить с целью выгоды*) һүҙ көрәштереү, һатыулашыу **3.** *страд. от* **торгова́ть** 4

**ТОРГО́ВЕЦ** *м* и **ТОРГО́ВКА** *ж* сауҙагәр, һатыу итеүсе, һатыусы; **кру́пный торго́вец** эре сауҙагәр; **торго́вец муко́й** он менән һатыу итеүсе

**ТОРГО́ВЛЯ** *ж* сауҙа, алыш-биреш, һатыу; **вне́шняя торго́вля** тышҡы сауҙа; **опто́вая торго́вля** күмәртә сауҙа, күмәртәләп һатыу; **торго́вля хле́бом** икмәк һатыу

**ТОРГО́ВО-ПРОМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое сауҙа-сәнәғәт; **торго́во-промы́шленный центр** сауҙа-сәнәғәт үҙәге

**ТОРГО́ВЫЙ,** -ая, -ое сауҙа ...ы; **торго́вый оборо́т** сауҙа әйләнеше; **торго́вая поли́тика** сауҙа (һатыу итеү) сәйәсәте; **торго́вые ряды́** сауҙа рәттәре

**ТОРГПРЕ́Д** *м* (*торговый представитель*) сауҙа вәкиле

**ТОРГПРЕ́ДСТВО** *с* (*торговое представительство*) сауҙа вәкиллеге

**ТОРЕАДО́Р** *м* тореадор (*Испанияла, Латин Америкаһы илдәрендә үгеҙҙәр һуғышында ҡатнашыусы*)

**ТОРЕ́Ц** *м* **1.** (*поперечный срез бревна, доски и т.д.*) арҡыры киҫем **2.** (*брусок*) бурса, бүрәнә осо **3.** *разг.* (*мостовая из таких брусков*) бурса түшәлгән урам

**ТОРЖЕ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое тантаналы; **торже́ственное собра́ние** тантаналы йыйылыш; **торже́ственная кля́тва** тантаналы ант

**ТОРЖЕСТВО́** *с* **1.** (*празднество*) тантана, байрам; **семе́йное торжество́** ғаилә байрамы **2.** (*победа, успех*) өҫтөн сығыу, еңеү, өҫтөнлөк, шатлыҡ; **торжество́ справедли́вости** ғәҙеллектең өҫтөн сығыуы

**ТОРЖЕСТВОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *что*; тантана итеү; **торжествова́ть побе́ду** еңеүҙе тантана итеү **2.** *над кем-чем* и *без доп.* өҫтөнлөк алыу, еңеү; **добро́ торжеству́ет над злом** яҡшылыҡ яманлыҡтан өҫтөнлөк ала

**ТО́РИЙ** *м* торий (*химик элемент, металл*)

**ТОРИ́Т** *м*; *хим.* торит (*радиоактив минерал*)

**ТОРИЧЕ́ЛЛИЕВ: ториче́ллиева пустота́** Торичелли бушлығы (*XVII б. Италия физигы исеменән*)

**ТОРМА́ШКИ: вверх торма́шками:** 1) мәтәлләү, баш түбән тороу (әйләнеү), баш(ы) аша тәгәрәү; 2) аҫты өҫкә килеү

**ТОРМОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **тормози́ть**; **э́кстренное торможе́ние** ашығыс тормозлау **2.** *физиол.* тотҡарла(ны)у, туҡтау

**ТО́РМОЗ** *м* **1.** тормоз (*машиналарҙың йөрөшөн аҡрынайтыу йәки туҡтатыу йайланмаһы*); **ручно́й то́рмоз** ҡул тормозы **2.** *см.* **торможе́ние 3.** *перен.* ҡамасау(лыҡ), кәртә, тотҡарлыҡ; **быть то́рмозом в рабо́те** эштә ҡамасау булып тороу ♦ **спусти́ть на тормоза́х** эште шым ғына яйлау, ҡаршылыҡты юҡ итеү, ҡаршылыҡтан ҡотолоу

**ТОРМОЗИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* тормозлау, тотҡарлау, туҡтатыу, тормозға һалыу; **маши́ну на́до тормози́ть** машинаны туҡтатырға кәрәк **2.** *что*; *перен.* (*мешать*) ҡамасаулау, ҡамасаулыҡ итеү, тотҡарлыҡ итеү; **тормози́ть рабо́ту** эшкә ҡамасаулау

**ТОРМОЗИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** тотҡарланыу, кәртә ҡуйылыу (*берәй эшкә*) **2.** *страд. от* **тормози́ть**

**ТОРМОЗНО́Й,** -ая, -ое тормоз ...ы, тормозлау ...ы; **тормозна́я жи́дкость** тормоз шыйыҡсаһы

**ТОРМОШИ́ТЬ** *несов. кого*; *разг.* **1.** тартҡылау, йолҡҡолау, төрткөләү; **тормоши́ть ребёнка** баланы тартҡылау **2.** *перен.* (*надоедать*) алйытыу, йонсотоу, йөҙәтеү

**ТО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** таҡыр, тигеҙ, тапалған; **то́рная доро́га** таҡыр юл **2.** *перен.* асыҡ, билдәле, ғәҙәти, ҡыйын (ауыр) булмаған, анһат, еңел (*тормош юлына ҡарата*)

**ТОРОКА́** *мн.* ҡанъяға (*эйәрҙең артына төрлө нәмә бәйләү өсөн тағылған нәҙек ҡайыштар*)

**ТОРОПИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* ашыҡтырыу, ҡабаландырыу, өтәләү; **торопи́ть с отъе́здом** китергә ҡабаландырыу **2.** *что* (*ускорять*) тиҙләштереү, тиҙләтеү; **торопи́ть собы́тия** ваҡиғаларҙы тиҙләтеү

**ТОРОПИ́ТЬСЯ** *несов.* ашығыу, ҡабаланыу, өтәләнеү; **торопи́ться на рабо́ту** эшкә ашығыу; **куда́ торо́пишься?** ҡайҙа ашығаһың?

**ТОРОПЛИ́ВО** *нареч.* ҡабалан, ашығыс рәүештә, йәһәт кенә, тиҙ-тиҙ, ашыҡ-бошоҡ; **шага́ть торопли́во** ҡабалан атлау; **рабо́тать торопли́во** ашыҡ-бошоҡ эшләү

**ТОРОПЛИ́ВОСТЬ** *ж* ҡабаланыу, ашығыу

**ТОРОПЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о человеке*) ашығыусан, ҡабаланыусан, өтәлән, ҡалбыр; **торопли́вый челове́к** өтәлән кеше **2.** (*поспешный, быстрый*) ашығыс, ҡабалан, тиҙ (йәһәт) башҡарылған; **торопли́вые шаги́** ҡабалан аҙымдар

**ТОРОПЫ́ГА** *м* и *ж*; *прост.* ҡабалан кеше, өтөк, ҡалбыр

**ТОРО́С** и **ТО́РОС** *м* боҙ өйөмө, өйөлгән боҙ тауы

**ТОРО́СИСТЫЙ,** -ая, -ое боҙ өйөмдәре күп булған

**ТОРПЕ́ДА** *ж* торпеда (*үҙйөрөшлө һыу аҫты снаряды*); **пусти́ть торпе́ду** торпеда ебәреү

**ТОРПЕДИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** торпеда ебәреү, торпеда менән һөжүм итеү **2.** *горн.* торпедалау (*шартлатыу*) **3.** *перен.* (*сорвать, срывать что-л.*) ҡаршы тороу (килеү), өҙөү

**ТОРПЕДИ́СТ** *м* торпедасы

**ТОРПЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** торпеда ...ы; **торпе́дный аппара́т** торпеда аппараты **2.** торпедалы; **торпе́дный ка́тер** торпедалы катер

**ТОРПЕДОНО́СЕЦ** *м* торпедалы, торпедаһы булған (*самолёт*)

**ТОРПЕДОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое торпедалар менән ҡоралланған

**ТОРС** *м* **1.** (*туловище человека*) кәүҙә, кеше кәүҙәһе **2.** *иск.* торс (*башһыҙ, ҡул-аяҡһыҙ скульптура һыны*)

**ТОРТ** *м* торт; **шокола́дный торт** шоколадлы торт; **купи́ть торт** торт һатып алыу

**ТО́РТНИЦА** *ж* торт һауыты

**ТОРФ** *м* торф, һаҙ тиреҫе; **добыва́ть торф** торф сығарыу

**ТОРФОПЕРЕГНО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое торфлы серемтә ...ы; **торфоперегно́йные горшо́чки** торфлы серемтә көршәктәре

**ТОРФОРАЗРАБО́ТКИ** *мн.* торф сығарыу урыны

**ТОРФЯНИ́К** и **ТОРФЯ́НИК** *м* **1.** (*залежь торфа*) торфлы һаҙлыҡ, торф һаҙлығы (яҡҡылығы) **2.** (*о человеке*) торф сығарыусы, торф белгесе

**ТОРФЯНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое торфлы; **торфяни́стая по́чва** торфлы тупраҡ

**ТОРФЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** торфлы; **торфяно́е боло́то** торфлы һаҙлыҡ **2.** (*работающий на торфе*) торфта эшләгән; **торфяна́я электроста́нция** торф менән эшләгән электр станцияһы

**ТОРЦЕВА́ТЬ** *несов.*; *спец. что* **1.** бурса (бүкән) түшәү; **торцева́ть мостову́ю** урамға бурса түшәү **2.** (*обрабатывать торцы*) бүрәнә башын ҡырҡыу

**ТОРЦЕВО́Й,** -ая, -ое *см.* **торцо́вый**

**ТОРЦО́ВКА** *ж* **1.** *спец. см.* **торцева́ть 2.** *разг.* бурсалау станогы **3.** торцовка (*маляр щёткаһы*)

**ТОРЦЕВО́Й** и **ТОРЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** *спец.* арҡыры; **торцева́я стена́** арҡыры стена **2.** (*покрытый торцами*) бурса түшәлгән; **торцо́вая мостова́я** бурса түшәлгән урам

**ТОРЧА́ТЬ** *несов.* **1.** тырпайып тороу, сурайыу, һерәйеү; **во́лосы торча́т** сәс тырпайып тора **2.** *разг.* (*высовываться*) сығып тороу, һәлберәү; **пистоле́т торчи́т из карма́на** кеҫәнән пистолет сығып тора **3.** *разг.* (*возвышаться над поверхностью*) сығып (һерәйеп) тороу; **бревно́ торчи́т из воды́** бүрәнә һыуҙан сығып тора **4.** *перен., разг.* (*надоедать присутствием*) һерәнләү (*буштан-бушҡа кеше алдында һерәйеп йөрөү*)

**ТОРЧКО́М** *нареч.*; *разг.* тырпайып, һерәйеп, япрый; **во́лосы стоя́т торчко́м** сәстәре тырпайып тора

**ТОРШЕ́Р** *м* торшер (*оҙон таяулы лампа*)

**ТОСКА́** *ж* **1.** һағыш, һағыныу; **тоска́ берёт** һағыш баҫа; **тоска́ по ро́дине** тыуған илде һағыныу **2.** (*скука*) эс бошоу, бошоноу ♦ **тоска́ зелёная** *см.* **зелёный**

**ТОСКЛИ́ВО 1.** *нареч.* яманһыу; **тоскли́во смотре́ть** яманһыу ҡарау **2.** *кому в знач. сказ., безл.* күңелһеҙ, моңһоу; **мне тоскли́во** миңә күңелһеҙ

**ТОСКЛИ́ВОСТЬ** *ж* яманһыулыҡ, һағышлылыҡ, моңһоулыҡ

**ТОСКЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*исполненный тоски*) һағышлы, яманһыу, моңһоу; **тоскли́вая пе́сня** һағышлы йыр **2.** (*наводящий тоску*) эс бошорғос, күңелдә һағыш уятҡан, күңелһеҙ; **тоскли́вая пого́да** эс бошорғос көн

**ТОСКОВА́ТЬ** *несов.* һағыныу, юҡһыныу, бошоноу; **тоскова́ть по ма́тери** әсәйҙе һағыныу; **тоскова́ть по родны́м места́м** тыуған яҡтарҙы юҡһыныу

**ТОСТ** *м* тост; **провозгласи́ть тост** тост әйтеү

**ТОТ** *м* (та *ж*, то *с*) *мест.* **1.** анау, ул, шул, теге; **э́то тот са́мый челове́к** был тап шул кеше **2.** анау, теге, арғы; **на том берегу́** арғы ярҙа **3.** ул, ундай; **вот та кни́га** бына ул китап **4.** (*при перечислении*) ул да, теге; **ни тот, ни друго́й** ул да түгел, башҡа ла түгел; **тот и́ли ино́й** тегеһе йәки башҡа берәйһе **5.** *в знач. сущ.* **то** *с* уныһы; **то бы́ло вчера́, а э́то сего́дня** уныһы кисә булғайны, ә был бөгөн ♦ **не то, что (что́бы)** бик үк түгел, әллә ни түгел; **ни с того́ ни с сего́** һис юҡтан, сәбәпһеҙ-ниһеҙ; **тот и́ли ино́й**; **тот и́ли друго́й** кемдер берәйһе; **отпра́вить на тот свет** *см.* **отпра́вить**; **отпра́виться на тот свет** *см.* **отпра́виться**

**ТОТАЛИЗА́ТОР** *м* **1.** тотализатор (*бәйгелә ҡайһы атҡа нисә һум ҡуйылғанды күрһәткән счётчик*) **2.** (*игра на бегах и скачках*) бәйгелә аҡса уйыны

**ТОТАЛИТАРИ́ЗМ** *м*; *книжн.* тоталитаризм (*тоталитар режим*)

**ТОТАЛИТА́РНОСТЬ** *ж*; *книжн.* тоталитарлыҡ

**ТОТАЛИТА́РНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* тоталитар; **тоталита́рное госуда́рство** тоталитар дәүләт

**ТОТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* дөйөм, тоталь; **тота́льная война́** тоталь һуғыш; **тота́льная мобилиза́ция** дөйөм мобилизация

**ТОТЕ́М** *м* тотем (*ырыу-ҡәбилә йәмғиәте осоронда табына торған хайуан, үҫемлек йәки тәбиғәт күренеше*)

**ТОТЕМИ́ЗМ** *м* тотемизм, мәжүсилек

**ТОТЕМИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тотемистик, тотемизм ...ы, мәжүси; **тотемисти́ческие ве́рования** тотемистик ышаныу (инаныу)

**ТО́-ТО** *частица*; *разг.* **1.** (*в том то и дело*) тап, нәҡ, шул-шул; **вот то́-то** бына шул-шул **2.** (*вот почему*) әйтәм, бына; **то́-то вы бои́тесь её** әйтәм һеҙ унан ҡурҡаһығыҙ **3.** (*вот уж*) бына; **то́-то она́ удиви́тся** бына ул ғәжәпләнер инде

**ТО́ТЧАС** и *разг.* **ТОТЧА́С** *нареч.* шунда уҡ, хәҙер үк, һағәттә; **то́тчас же приду́** шунда уҡ килермен

**ТОЧЕ́НИЕ** *с см.* **точи́ть** 1—3

**ТОЧЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*наточенный, острый*) ҡайралған, сарланған, үткерләнгән; **точёный нож** үткерләнгән бысаҡ **2.** (*выточенный*) ҡырылған, ҡырып яһалған (*орсоҡ*); **точёные изде́лия** ҡырып яһалған нәмәләр **3.** *перен.* (*изящный, тонкий*) ҡойоп ҡуйған кеүек, күркәм, нәфис; **точёные па́льцы** нәфис бармаҡтар

**ТО́ЧЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** төрткө-төрткө, төртөп-төртөп яһалған; **то́чечный узо́р** төрткө-төрткө биҙәк **2.** *спец.* (*в виде точки*) нөктә кеүек, нөктә; **то́чечный исто́чник све́та** нөктә кеүек яҡтылыҡ сығанағы **3.** (*направленный на отдельные точки*) айырым нөктәләргә (эшләү); **то́чечный масса́ж** айырым нөктәләргә массаж

**ТОЧИ́ЛКА** *ж* **1.** беләү, ҡайраҡ; (*для кос*) яныуыс **2.** *разг.* ҡәләм ослағыс

**ТОЧИ́ЛО I** *с* ҡайраҡ, сар, сарлау станогы; **точи́ть топо́р точи́лом** ҡайраҡ менән балта ҡайрау

**ТОЧИ́ЛО II** *с* (*в виноделии*) йөҙөм һыҡҡыс

**ТОЧИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое беләү, сарлау, ҡайраҡ, яныуыс; **точи́льный ка́мень** ҡайраҡ таш

**ТОЧИ́ЛЬЩИК** *м* **1.** ҡайраусы, сарлаусы, үткерләүсе (*кеше*) **2.** *зоол.* ағас ҡуңыҙы

**ТОЧИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* (*нож*) үткерләү, ҡайрау, яныу; (*топор*) сарлау, ҡайрау, үткерләү; (*косу*) яныу; (*бритву*) беләүләү; (*пилу, коньки*) игәү; (*саблю, шашку*) ҡайрау, сарлау, яныу **2.** *что* (*заострять*) ослау; **точи́ть каранда́ш** ҡәләм ослау **3.** *что* (*вытачивать*) ҡырып яһау; **точи́ть дета́ли** деталдәрҙе ҡырып яһау **4.** (*прогрызать*) кимереү (*ҡорт тураһында*) **5.** (*постепенно разрушать*) өңөп ашау (*һыу ярҙы*) **6.** *кого*; *перен.* (*мучить*) яфалау, интектереү, йөҙәтеү, һарғайтыу; **го́ре то́чит** ҡайғы һарғайта **7.** *перен., разг.* (*беспрестанно бранить*) игәп (әрләп) тороу, игәү, әрләү ♦ **точи́ть ля́сы** *см.* **ля́сы**; **точи́ть зу́бы** *см.* **зуб**

**ТО́ЧКА I** *ж* **1.** (*след от прикосновения, укола*) тап, төрткө, тимгел; **чёрная то́чка** ҡара төрткө **2.** (*знак препинания*) нөктә, төрткө; **ста́вить то́чку** нөктә ҡуйыу **3.** (*место в пространстве, на плоскости*) урын, ер; **са́мая высо́кая то́чка горы́** тауҙың иң бейек урыны **4.** *спец.* нөктә; **то́чка весе́ннего равноде́нствия** яҙғы көн һәм төн тигеҙлек нөктәһе; **то́чка пересече́ния прямы́х** тура һыҙыҡтарҙың киҫешеү нөктәһе **5.** (*место расположения*) урын, нөктә; **торго́вая то́чка** сауҙа итеү урыны; **огнева́я то́чка** ут нөктәһе **6.** *в знач. сказ.*; *разг.* (*кончено*) вәссәләм, бөттө; **ещё час порабо́таю и — то́чка** тағы бер сәғәт эшләйем дә — вәссәләм ♦ **то́чка замерза́ния** туңыу нөктәһе; **мёртвая то́чка** тынлыҡ нөктәһе; **то́чка зре́ния** *см.* **зре́ние**; **то́чка в то́чку** теп-теүәл, тәңгәл генә (тура килтереү); **ста́вить то́чку** эште туҡтатыу; **бить в (одну́) то́чку** *см.* **бить**; **то́чка с запято́й** нөктәле өтөр

**ТО́ЧКА II** *ж см.* **точи́ть** 1—3; **то́чка ноже́й** бәкеләр үткерләү

**ТО́ЧНО I** *нареч.* **1.** тап, теүәл, дөрөҫ; **то́чно в три часа́** тап сәғәт өстә; **то́чно воспроизвести́ ко́пию** күсермәһен дөрөҫ итеп эшләү **2.** (*в сочетании со словами “такой”, “тот”, “так”*) тап, нәҡ, бөтөнләй; **то́чно така́я же кни́га** тап шундай китап **3.** *в знач. вводн. сл.* ысынлап та; **она́, то́чно, краси́ва** ул, ысынлап та, сибәр

**ТО́ЧНО II** *союз* и *частица* **1.** *союз сравн.* (*как, словно*) тап ... кеүек, тап, -ға/-гә оҡшаш, һымаҡ, кеүек, әйтерһең, -дай/-дәй; **плывёт то́чно ле́бедь** тап аҡҡош кеүек йөҙә **2.** *частица*; *прост.* (*вроде*) дөрөҫ; **то́чно я здесь была́** дөрөҫ, мин бында булдым

**ТО́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** (*пунктуальность*) аныҡлыҡ, йыйнаҡлыҡ **2.** (*степень соответствия чему-л.*) дөрөҫлөк, тәңгәллек; **то́чность перево́да** тәржемәнең дөрөҫлөгө ♦ **в то́чности** теп-теүәл, нәҡ

**ТО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*совершенно верный*) дөрөҫ, тәңгәл; **то́чный расчёт** дөрөҫ иҫәп; **то́чные часы́** дөрөҫ йөрөгән сәғәт; **то́чное сло́во** тәңгәл (дөрөҫ) һүҙ **2.** (*аккуратный, пунктуальный*) йыйнаҡ; **быть то́чным** йыйнаҡ булыу ♦ **то́чные нау́ки** аныҡ фәндәр

**ТОЧЬ-В-ТО́ЧЬ** *нареч.* тап, тас, дөп-дөрөҫ; **точь-в-то́чь оте́ц** тас атаһы; **она́ рассказа́ла всё точь-в-то́чь, как бы́ло** ул бөтәһен дә тап булғанса һөйләп бирҙе

**ТОШНИ́ТЬ** *несов. кого* күңел болғаныу, уҡшыу, ҡоҫҡо килеү; **тошни́ть от за́паха** еҫкә күңел болғаныу

**ТО́ШНО** *разг.* **1.** *нареч.* эс бошорғос **2.** *в знач. сказ., безл.* уҡшытыу, күңел болғаныу, ҡоҫҡо килеү **3.** *в знач. сказ., безл.*; *перен.* ауыр, сирҡаныс; **то́шно смотре́ть на них** уларға ҡарауы сирҡаныс

**ТОШНОТА́** *ж* **1.** күңел болғаныу (уйнау), уҡшы(ты)у, ҡоҫҡо килеү; **тошнота́ от за́паха** еҫтән уҡшыу **2.** *перен.* (*отвращение*) ерәнеү, ҡоҫҡо килеү

**ТОШНОТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*вызывающий тошноту*) уҡшытҡыс, күңел болғандырғыс, ҡоҫторғос; **тошнотво́рный за́пах** уҡшытҡыс еҫ **2.** *перен.*, (*вызывающий отвращение*) ерәнес; **тошнотво́рное зре́лище** ерәнес күренеш

**ТО́ШНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** уҡшытҡыс, ҡоҫторғос, күңел болғандырғыс **2.** *перен.* эс бошорғос; **то́шное заня́тие** эс бошорғос эш

**ТОЩА́ТЬ** *несов.*; *разг.* ябығыу, арыҡланыу

**ТО́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** (*худой*) ябыҡ, арыҡ; **то́щая скоти́на** арыҡ мал **2.** *перен., разг.* буш, һай; **то́щий портфе́ль** буш портфель **3.** (*скудный — о*

*колосе*) нәҙек, ас, ярлы, осоҡ; (*о растительности*) һирәк; (*о почве*) ашһыҙ ♦ **то́щий карма́н** *см.* **карма́н**

**ТПРУ** и **ТПРР** *межд.* тырр (*атты туҡтатҡанда әйтелә*) ♦ **ни тпру ни ну** *в знач. сказ.*; *прост.* ни алға ни артҡа

**ТРАВА́** *ж* үлән; (*молодая*) йәшән; (*весенняя*) зәржә; **со́рная трава́** ҡый үләне; **лека́рственная трава́** дарыу үләне ♦ **траво́й (быльём) поросло́** *см.* **быльё**; **хоть трава́ не расти́** иҫ китмәү, бар тип тә белмәү

**ТРАВЕНЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* (*зарастать травой*) үлән үҫеү (баҫып китеү)

**ТРА́ВЕРС I** и **ТРА́ВЕРЗ** *м* траверс, траверз (**1.** *хәрб. окопта һәм нығытмаларҙа балсыҡ өйөмө* **2.** *гидротех. йылғаның ярҙарын һаҡлау һәм ағыш юлын үҙгәртеү өсөн махсус дамба* **3.** *диңг., ав. караптың, осҡостоң алған курсына ҡарата перпендикуляр йүнәлеш*)

**ТРА́ВЕРС II** *м*; *спорт.* траверс (*альпинистарҙың тау теҙмәләре аша сығыуы*)

**ТРА́ВЕРСА** и **ТРА́ВЕРЗА** *ж*; *тех.* траверса, траверза (*берәй нәмәне нығытыу өсөн арҡыры һалынған һайғау*)

**ТРАВЕСТИ́** *с нескл.* травести (**1.** *театр. үҫмерҙәрҙе ҡатын-ҡыҙҙар уйнай торған роль* **2.** *әҙ. әҙәбиәттәге юмористик шиғриәттең бер төрө*: *етди йөкмәткене уға тап килмәй торған мәрәкә формала биреү*)

**ТРАВИ́НКА** *ж* бер бөртөк үлән

**ТРАВИ́ТЬ I** *несов.* **1.** *кого* ағыулау, ағыулап ҡырыу, үлтереү; **трави́ть мух** себендәрҙе ағыулау **2.** *что* (*производить потраву*) тапатыу, тапатып һәләк итеү (*ашлыкты, сәсеүҙе*); **трави́ть посе́вы** сәсеүлектәрҙе тапатыу **3.** *кого* һөсләү, ҡыуып тотоу (*эт, ҡош менән*) **4.** *что*; *спец.* ашатыу, уйҙырыу; **трави́ть узо́ры** биҙәктәр уйҙырыу **5.** *кого*; *перен.* (*преследовать*) эҙәрләү; (*о человеке*) яла яғыу, юрамал бәйләнеү, яла яғып ғәйепләү **6.** *спец.* таҙартыу, бөтөрөү, сығарыу; **трави́ть пя́тна** тапты бөтөрөү

**ТРАВИ́ТЬ II** *несов. что* **1.** *мор.* (аҡрынлап) бушатыу, бушата (ебәрә) төшөү, аҡрынлап ысҡындырыу; **трави́ть кана́т** арҡанды аҡрынлап бушатыу **2.** *спец.* (*выпускать пар, воздух, ослабляя давление*) сығарыу, кәметеү **3.** *безл.* (*тошнить*) сайҡатып ауырытыу

**ТРАВИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* (*принимать яд*) ағыу эсеү, ағыуланыу **2.** *страд. от* **трави́ть** I

**ТРА́ВЛЕНЫЙ I,** -ая, -ое *тех.* (*обработанный или изготовленный травлением*) уйҙырып (ашатып) яһалған (төшөрөлгән)

**ТРА́ВЛЕНЫЙ II,** -ая, -ое (*о звере*) һөсләтелгән, эт менән ҡыуҙырылған ♦ **тра́вленый волк (зверь)** ҡарт бүре (*күпте күргән, әсеһен-сөсөһөн татыған кеше*)

**ТРА́ВЛЯ** *ж* **1.** (*на охоте*) һөсләү, эт менән ҡыуыу (*кейекте*) **2.** *см.* **трави́ть** I 5

**ТРА́ВМА** *ж* травма, йәрәхәт(ләнеү), имгәнеү; **психи́ческая тра́вма** психик травма (*ауырыу*); **нанести́ тра́вму** йәрәхәт яһау

**ТРАВМАТИ́ЗМ** *м* травматизм, йәрәхәт, йәрәхәтләнеү, имгәнеү; **борьба́ с травмати́змом на произво́дстве** производствола имгәнеүҙәрҙе булдырмау өсөн көрәш; **бытово́й травмати́зм** көнкүрештәге йәрәхәт

**ТРАВМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое травматик, йәрәхәттән булған; **травмати́ческий шок** травматик шок

**ТРАВМАТО́ЛОГ** *м* травматолог (*травматология белгесе*)

**ТРАВМАТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое травматология ...ы, травматологик; **травматологи́ческое отделе́ние** травматология бүлеге

**ТРАВМАТОЛО́ГИЯ** *ж* травматология (*хирургияның төрлө имгәнеү-йәрәхәтләнеүҙәрҙе өйрәнә торған бүлеге*)

**ТРАВМИ́РОВАНИЕ** *с см.* **травми́ровать**

**ТРАВМИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* йәрәхәтләү, яралау

**ТРАВОПО́ЛЬЕ** *с*; *с.-х.* үлән сәсеү баҫыусылығы, үлән сәсеү системаһы (*төрлө ҡыяҡ үләндәрҙе ҡуҙаҡлылар менән ҡушып сәсеү*)

**ТРАВОПО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* үлән сәсеү баҫыусылығы ...ы; **травопо́льная систе́ма** үлән сәсеү баҫыусылығы системаһы

**ТРАВОСЕ́ЯНИЕ** *с* үлән сәсеү

**ТРАВОСМЕ́СЬ** *ж*; *с.-х.* үлән ҡатнашмаһы (*бер йыллыҡ һәм күп йыллыҡ ҡыяҡлылар менән ҡуҙаҡлылар ҡатнашмаһы*)

**ТРАВОСТО́Й** *м* үҫемлектәр (үләндәр) япмаһы (*көтөүлектәрҙә, сабынлыҡтарҙа*)

**ТРАВОЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое үлән ашаған (ашаусы); **травоя́дные живо́тные** үлән ашаған хайуандар

**ТРАВЯНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** үлән, үләнле; **травяни́стое ме́сто** үләнле ер **2.** *перен., разг.* (*безвкусный*) тәмһеҙ, үлән тәме килгән; **травяни́стый чай** тәмһеҙ сәй **3.** (*сходный с травой*) үлән кеүек, үлән

**ТРАВЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** үлән ...ы; **травяна́я мука́** үлән оно **2.** (*поросший травой*) үлән үҫкән (баҫҡан); **травяно́й луг** үлән баҫҡан туғай

**ТРАГЕДИ́ЙНОСТЬ** *ж* трагедиялылыҡ

**ТРАГЕДИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое трагик, трагедиялы, трагедия ...ы; **трагеди́йный арти́ст** трагедия артисы

**ТРАГЕ́ДИЯ** *ж* **1.** трагедия (*драма әҫәрҙәренең бер төрө*); **траге́дии Шекспи́ра** Шекспир трагедиялары

**ТРАГИ́ЗМ** *м* трагизм (**1.** *драматик әҫәрҙә трагик элемент* **2.** *трагедиялылыҡ*)

**ТРА́ГИК** *м* трагик (**1.** *трагик ролдәрҙе башҡарыусы актёр* **2.** *трагедия әҫәрҙәре яҙыусы*)

**ТРАГИКОМЕ́ДИЯ** *ж* трагикомедия (**1.** *әҙ. трагедия һәм комедия үҙенсәлектәрен үҙ эсенә*

*алған драматик әҫәр* **2.** *кһсм. ҡайғылы һәм көлкөлө ваҡиға)*

**ТРАГИКОМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*печальный и смешной*) трагикомик; ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та (*көлкө аралаш фажиғәле*); **трагикоми́ческий слу́чай** трагикомик ваҡиға **2.** трагикомик; **трагикоми́ческий сюже́т** трагикомик сюжет

**ТРАГИКОМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **трагикоми́ческий** 1

**ТРАГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*свойственный трагедии*) трагедия ...ы, трагик; **траги́ческий жанр** трагик жанр **2.** (*об актёре*) трагик; **траги́ческий актёр** трагик актёр **3.** (*страшный, ужасный*) трагик, фажиғәле, афәтле; **траги́ческая смерть** фажиғәле үлем

**ТРАГИ́ЧНОСТЬ** *ж* фажиғәлелек, трагедиялылыҡ, һәләкәтлек

**ТРАГИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое афәтле, фажиғәле, ауыр ҡайғылы; **траги́чная смерть** фажиғәле үлем

**ТРАДИЦИО́ННОСТЬ** *ж* ғәҙәткә ингәнлек, традициялылыҡ, традиция булып китеү

**ТРАДИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое традицион, йола булып киткән, ғәҙәткә ингән; **традицио́нный пра́здник** традицион байрам

**ТРАДИ́ЦИЯ** *ж* традиция, ғәҙәт, йола; **семе́йные тради́ции** ғаилә традициялары; **войти́ в тради́цию** йолаға инеү; **во́инские тради́ции** хәрби традициялар

**ТРАЕКТО́РИЯ** *ж*; *спец.* траектория (**1.** *махс. есемдең йәки нөктәнең хәрәкәт юлы* **2.** *хәрб. атылған снарядтың минаның һ.б. осоу юлы*)

**ТРАКТ** *м* оло юл, тракт; **автомоби́льный тракт** автомобиль тракты ♦ **желу́дочно-кише́чный тракт** *анат.* ашҡаҙан-эсәк юлы

**ТРАКТА́Т** *м* **1.** (*научное сочинение*) трактат, ғилми әҫәр, рисәлә; **составля́ть тракта́т** рисәлә төҙөү **2.** *уст.* трактат (*халыҡ-ара килешеү*)

**ТРАКТИ́Р** *м*; *уст.* трактир (*ресторанлы ҡунаҡхана, түбән разрядлы ресторан*)

**ТРАКТИ́РЩИК** *м* и **ТРАКТИ́РЩИЦА** *ж* трактирсы, трактир тотоусы

**ТРАКТОВА́НИЕ** *с см.* **трактова́ть, трактова́ться**; **пра́вильное трактова́ние** дөрөҫ аңлатып биреү

**ТРАКТОВА́ТЬ** *несов. что* аңлатыу, аңлатып (төшөндөрөп) биреү, ҡарашты әйтеү; **трактова́ть по-но́вому** яңыса аңлатыу

**ТРАКТОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*получать какое-л. объяснение*) тикшерелеү, ҡараш әйтелеү **2.** *страд. от* **трактова́ть**

**ТРАКТО́ВКА** *ж см.* **трактова́ть, трактова́ться**; **тракто́вка рома́на** романды аңлатыу

**ТРА́КТОР** *м* трактор; **колёсный тра́ктор** тәгәрмәсле трактор; **пропашно́й тра́ктор** аралыҡлы трактор

**ТРАКТОРИЗА́ЦИЯ** *ж* тракторлаштырыу, трактор ҡулланыуҙы индереү

**ТРАКТОРИ́СТ** *м* и **ТРАКТОРИ́СТКА** *ж* тракторсы; **тракторист-машини́ст широ́кого про́филя** киң профилле тракторсы-машинист

**ТРА́КТОРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** трактор(ҙар) ...ы, тракторлы; **тра́кторный заво́д** трактор заводы **2.** трактор менән; **тра́кторный сев** трактор менән сәсеү

**ТРАКТОРОСТРОЕ́НИЕ** *с* тракторҙар эшләп сығарыу

**ТРАКТОРОСТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тракторҙар эшләп сығарыу ...ы

**ТРАЛ** *м* трал (**1.** *тоҡ һымаҡ ҙур ау* **2.** *һыу аҫты миналарын таба торған ҡорал* **3.** *диңгеҙ төбөн һәм ундағы хайуандарҙы, үҫемлектәрҙе тикшереү ҡоралы*)

**ТРА́ЛЕР** *м см.* **тра́льщик** 1

**ТРА́ЛИТЬ** *несов. что* **1.** *рыб.* трал менән балыҡ тотоу, траллау **2.** *воен., мор.* трал менән мина тотоу **3.** *спец.* (*исследовать дно*) тралл менән тикшереү; **тра́лить проли́в** трал менән боғаҙҙы тикшереү

**ТРА́ЛЬЩИК** *м* траллаусы (**1.** *трал менән балыҡ тотоу судноһы* **2.** *һыу аҫтындағы миналарҙы тотоу өсөн булған хәрби судно* **3.** *трал менән балыҡ тотоуға етәкселек итеүсе кеше*)

**ТРАМБОВА́ТЬ** *несов. что* төйгөсләп (тыңҡыслап) тигеҙләү, тапау, ҡыҫтап-ҡыҫтап тигеҙләү (тығыҙлау); **трамбова́ть зе́млю** ерҙе төйгөсләп тигеҙләү

**ТРАМБО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **трамбова́ть 2.** (*орудие*) тығыҙлағыс (*төйгөсләү ҡоралы*)

**ТРАМБО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое төйгөсләп тығыҙлау ...ы, төйгөсләп тигеҙләү ...ы; **трамбо́вочная маши́на** төйгөсләп тығыҙлау машинаһы

**ТРАМВА́Й** *м* трамвай; **е́хать трамва́ем** трамвайҙа барыу ♦ **речно́й трамва́й** һыу трамвайы (*пассажирҙарҙы йөрөтә торған катер*)

**ТРАМВА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое трамвай ...ы; **трамва́йная ли́ния** трамвай юлы

**ТРАМВА́ЙЩИК** *м* и **ТРАМВА́ЙЩИЦА** *ж* трамвайсы

**ТРАМПЛИ́Н** *м* **1.** һикертмәк, һикереү баҫмаһы, трамплин; **лы́жный трампли́н** саңғы трамплины **2.** *перен.* терәк (*берәр эштең башланғыс пункты, таяныс*)

**ТРАНЖИ́Р** *м* и **ТРАНЖИ́РА** *м* и *ж*; *разг.* мал (аҡса) туҙҙырыусы, әрәм-шәрәм (әләф-тәләф, исраф) итеүсе

**ТРАНЖИ́РИТЬ** *несов., что*; *разг.* исраф (тәләф, әрәм-шәрәм) итеү, мал (аҡса) туҙҙырыу, әрәмгә (бушҡа) ебәреү; **транжи́рить де́ньги** аҡсаны исраф итеү

**ТРАНЖИ́РИТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* тәләф (исраф) булыу **2.** *страд. от* **транжи́рить**

**ТРАНЖИ́РСТВО** *с*; *разг.* исрафлау, тәләфләү, мал (аҡса) туҙҙырыу; **привы́чка к транжи́рству** аҡса туҙҙырыу ғәҙәте

**ТРАНЗИ́СТОР** *м* транзистор (*электр сигналдарын үҙгәртә, көсәйтә торған ярым үткәргес прибор*)

**ТРАНЗИ́СТОРНЫЙ,** -ая, -ое транзисторлы ♦ **транзи́сторный радиоприёмник** транзисторлы радиоалғыс

**ТРАНЗИ́Т** *м* транзит (**1.** *илдәр аша тауар йәки пассажирҙар сығарыу* **2.** *бер ерҙән икенсе ергә аралыкта бушатмай тауар ташыу*); **посла́ть гру́зы транзи́том** йөктәрҙе транзит менән ебәреү

**ТРАНЗИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үтеп барыусы, транзит, транзит ...ы; **транзи́тные гру́зы** транзит йөктәр **2.** транзитлы; **транзи́тная торго́вля** транзитлы сауҙа

**ТРАНКВИЛИЗА́ТОР** *м*; *мед.* транквилизатор (*тынысландырғыс дарыу, препарат*)

**ТРАНС** *м* транс; **впасть в транс** аҡыл томаланыу (*нервыларҙың ярһыуы һөҙөмтәһендә*)

**ТРАНС...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең ниндәйҙер аралыҡ аша хәрәкәтте, нимәнеңдер артынан эйәреүҙе аңлатҡан тәүге өлөшө, мәҫ.,* **трансальпи́йский** Альп тауҙары аша; **трансокеа́нский** океан аша

**ТРАНСАТЛАНТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое трансатлантик (*Атлантик океан аша йөрөй торған*); **трансатланти́ческий ла́йнер** трансатлантик лайнер

**ТРАНСКОНТИНЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое континент-ара, ҡитғалар аша, трансконтиненталь; **трансконтинента́льная раке́та** континент-ара ракета

**ТРАНСКРИБИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *лингв.* транскрипциялау, транскрипция яһау; **транскриби́ровать текст** тексты транскрипциялау

**ТРАНСКРИПЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* транскрипция ...ы; **транскрипцио́нные зна́ки** транскрипция тамғалары

**ТРАНСКРИ́ПЦИЯ** *ж* транскрипция (**1.** *лингв. шартлы тамғалар менән телдәге өндәрҙе әйтелгән килеш яҙыу һәм шулай яҙыу системаһы* **2.** *муз. бер төр музыка ҡоралы йәки тауыш өсөн яҙылған әҫәрҙе икенсе төр музыка ҡоралына йәки тауышҡа яраҡлаштырыу*)

**ТРАНСЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* трансляциялау, трансляция яһау (*радио, телевидение аша тапшырыу*); **трансли́ровать конце́рт** концертты трансляциялау

**ТРАНСЛИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **трансли́ровать**

**ТРАНСЛИТЕРА́ЦИЯ** *ж*; *лингв.* транслитерация (*бер алфавит хәрефтәрен икенсе алфавит хәрефтәре менән биреү*)

**ТРАНСЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое трансляция ...ы; **трансляцио́нный у́зел** трансляция үҙәге

**ТРАНСЛЯ́ЦИЯ** *ж* трансляция (**1.** *телмәрҙе, музыканы һ.б. алыҫҡа радио, телевидение һ.б. аша биреү* **2.** *һөйл. шул юл менән һөйләнгән, тапшырылған хәбәр һ.б.*)

**ТРАНСМИССИО́ННЫЙ,** -ая, -ое трансмиссия ...ы; **трансмиссио́ный реме́нь** трансмиссия ҡайышы

**ТРАНСМИ́ССИЯ** *ж* трансмиссия (*хәрәкәтте двигателдән машинаға күсерә торған махсус ҡулайлама*)

**ТРАНСПАРА́НТ** *м* транспарант (**1.** *рамға килгән рәсемле туҡыма йәки ҡағыҙ* **2.** *ҡағыҙға тура яҙыу өсөн аҫтына һалына торған һыҙыҡлы махсус бит*)

**ТРАНСПЛАНТА́ЦИЯ** *ж* трансплантация (**1.** *мед. ағзаның бер урынын киҫеп икенсе урынды ямау* **2.** *баҡса. бер үҫемлек киҫәген икенсе үҫемлеккә күсереп ялғау*)

**ТРАНСПЛАНТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* трансплантация яһау, күсереп ҡуйыу

**ТРАНСПЛАНТОЛО́ГИЯ** *ж*; *мед.* трансплантология (*медицина һәм биологияның трансплантация мәсьәләләрен өйрәнә торған тармағы*)

**ТРА́НСПОРТ** *м*; *в разн. знач.* транспорт; **пасса́жирский тра́нспорт** пассажирҙар транспорты; **городско́й тра́нспорт** ҡала транспорты; **автомоби́льный тра́нспорт** автомобиль транспорты

**ТРАНСПО́РТ** *м*; *бухг.* транспорт, сығарма (*сумманы икенсе биткә күсереү*)

**ТРАНСПОРТА́БЕЛЬНОСТЬ** *ж* күсереп йөрөтмәлелек

**ТРАНСПОРТА́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күсереп йөрөтмәле; **транспорта́бельный больно́й** күсереп йөрөтмәле ауырыу

**ТРАНСПОРТЁР** *м* **1.** транспортёр (*йөк күсереү ҡоролмаһы*) **2.** *см.* **бронетранспортёр**

**ТРАНСПОРТИ́Р** *м* транспортир (*мөйөш үлсәү һәм һыҙыу приборы*)

**ТРАНСПОРТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **транспорти́ровать**; **транспорти́рование зерна́** ашлыҡ ташыу

**ТРАНСПОРТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* күсереү, ташыу, йөрөтөү; **транспорти́ровать груз** йөк ташыу

**ТРАНСПОРТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **транспорти́ровать**

**ТРАНСПОРТИРО́ВКА** *ж см.* **транпорти́ровать**; **транспортиро́вка не́фти и га́за** газ һәм нефтте йөрөтөү; **транспортиро́вка зерна́** ашлыҡ ташыу

**ТРА́НСПОРТНИК** *м* транспортта эшләүсе, транспорт эшсеһе

**ТРА́НСПОРТНЫЙ,** -ая, -ое транспорт ...ы; **тра́нспортные рабо́чие** транспорт эшселәре

**ТРАНСФОРМА́ТОР** *м* трансформатор (**1.** *алмаш электр тоғының көсөргәнешлелеген күтәреү йәки түбәнәйтеү аппараты* **2.** *бер үк ваҡытта төрлө ролдәрҙе бер-бер артлы башҡарыусы актёр* **3.** *фокустар күрһәтеүсе*)

**ТРАНСФОРМА́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое трансформатор ...ы; **трансформа́торная бу́дка** трансформатор будкаһы

**ТРАНСФОРМА́ЦИЯ** *ж* **1.** (*превращение*) үҙгәреү, әүерелеү **2.** трансформациялау (*тышҡы ҡиәфәтте бик тиҙ үҙгәртеп, төрлө ролдәрҙе башҡарыу йәки күрһәтеү*) **3.** трансформация (*трансформатор ярҙамында электр тоғын үҙгәртеү*)

**ТРАНСФОРМИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* үҙгәртеү, әүерелдереү

**ТРАНСФОРМИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* (*преобразовываться*) үҙгәреү, әүерелеү **2.** *страд. от* **трансформи́ровать**

**ТРАНСЦЕНДЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое трансцендент (**1.** *фәлс. тәжрибәнән ситтә булған* **2.** *мат. алгебраик ғәмәл аша сығарып булмай торған*); **трансценде́нтное уравне́ние** трансцендент тигеҙләмә

**ТРАНШЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое траншея ...ы

**ТРАНШЕ́Я** *ж* траншея, соҡор; **копа́ть транше́ю** траншея ҡаҙыу; **си́лосная транше́я** силос соҡоро

**ТРАП I** *м* трап, баҫҡыс (*караптарҙа, самолёттарҙа*); **спусти́ть трап** трап төшөрөү

**ТРАП II** *м; спец.* трап, тишек (*иҙәндә канализация өсөн махсус эшләнгән*)

**ТРА́ПЕЗА** и **ТРАПЕ́ЗА** *ж* аш табыны (өҫтәле)

**ТРАПЕЦИЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое трапецияға оҡшаш, трапеция рәүешендәге

**ТРАПЕ́ЦИЯ** *ж* трапеция (**1.** *мат. ике яғы параллелле дүртмөйөш* **2.** *спорт. ике бауға аҫылған арҡыры ағас, тимер*)

**ТРА́ССА** *ж; в разн. знач.* трасса, юл; **тра́сса метро́** метро трассаһы; **тра́сса снаря́да** снаряд трассаһы; **автомоби́льная тра́сса** автомашина юлы

**ТРАССИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** *что* йүнәлеш билдәләү, юл һыҙыу **2.** эҙ ҡалдырып осоу, яҡтыртып осоу (*туп, пуля тураһында*)

**ТРАССИРО́ВКА** *ж см.* **трасси́ровать**

**ТРАССИ́РУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **трасси́ровать** **2.** *прил.* яҡтыртып осоусы; **трасси́рующая пу́ля** яҡтыртып осоусы пуля

**ТРА́ТА** *ж* **1.** *см.* **тра́тить**; **тра́та вре́мени** ваҡытты әрәм итеү **2.** *обычно мн.* **тра́ты** сығымдар; **больши́е тра́ты** ҙур сығымдар

**ТРА́ТИТЬ** *несов. что* (*деньги*) тотоу, тотоноу, түгеү, әрәм (әрәм-шәрәм, исраф, сарыф, тәләф) итеү, тотоп (тотоноп) бөтөрөү; (*силы*) түгеү; (*время*) әрәм (сарыф) итеү

**ТРА́ТИТЬСЯ** *несов.* **1.** тотоу, сығымланыу **2.** *страд. от* **тра́тить**

**ТРА́УЛЕР** *м см.* **тра́льщик** 1

**ТРА́УР** *м* **1.** (*состояние скорби*) матәм, траур **2.** (*чёрная одежда, повязка в знак скорби*) траур кейеме, матәм билдәһе; **носи́ть тра́ур** траур кейемендә йөрөү

**ТРА́УРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** матәм ...ы, траур ...ы; **тра́урная оде́жда** матәм кейем **2.** *перен.* ҡайғылы; **тра́урное настрое́ние** ҡайғылы кәйеф

**ТРАФАРЕ́Т** *м* трафарет (**1.** *рәсемде механик юл менән күсереү өсөн ҡатырғанан, ҡалайҙан һ.б. киҫеп яһалған өлгө* **2.** *киҫеп эшләнгән хәрефтәр, һандар менән яҙылған яҙыу* **3.** *күсм. иҫкергән үрнәк, һуҡырҙарса эшләнгән өлгө*)

**ТРАФАРЕ́ТНЫЙ,** -ая, ое **1.** трафарет; **трафаре́тный рису́нок** трафарет һүрәт **2.** *перен.* (*избитый, шаблонный*) күп сәйнәлгән, иҫкергән; **трафаре́тная мысль** күп сәйнәлгән фекер

**ТРАХ** *межд.* **1.** шарт, шатыр, гөрҫ **2.** *в знач. сказ.; разг.* шап (шаҡ, гөп, гөрҫ, тыңҡ һ.б.) итеү; **трах кулако́м по́ столу** йоҙроҡ менән өҫтәлгә шап итте

**ТРАХЕИ́Т** *м; мед.* трахеит (*боғарлаҡ тиресәһенең шешеүе*)

**ТРАХЕ́Я** *ж* **1.** *анат.* боғарлаҡ, ҡурылдай, трахея **2.** *зоол., бот.* трахея

**ТРА́ХНУТЬ** *сов.; разг.* **1.** шарт (шатыр, гөрҫ) итеү; **тра́хнуть из ружья́** мылтыҡтан шарт итеп атыу **2.** *кого-что* и *без доп.* (*ударить*) шап (гөп) иттереп һуғыу

**ТРА́ХНУТЬСЯ** *сов.; разг.* **1.** (*сильно удариться*) тыңҡ (шаҡ) итеү **2.** (*упасть с шумом*) шап (лып, лап) итеү; **тра́хнуться на зе́млю** ергә лап итеү

**ТРАХО́МА** *ж* трахома, бысый күҙ (*йоғошло күҙ ауырыуы*)

**ТРАХОМАТО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *мед.* **1.** трахома ...ы, трахоматоз; **трахомато́зные измене́ния** трахома үҙгәрештәре **2.** трахомалы; **трахомато́зный больно́й** трахомалы ауырыу

**ТРАХО́МНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **трахомато́зный** 2

**ТРЕ...** и **ТРЁХ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең өс бер төрлө сифатҡа эйә булыу, өс күләм мәғәнәләрен аңлатҡан тәүге өлөшө, мәҫ.,* **трено́гий** өс аяҡлы; **трёха́ктный** өс акттан торған

**ТРЕ́БНИК** *м* доғалыҡ, доға китабы

**ТРЕ́БОВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **тре́бовать** 1; **2.** талап, ҡәтғи һорау; **настоя́тельное тре́бование** ныҡышмалы талап; **тре́бование вре́мени** заман талабы **3.** (*официальный документ*) требование (*рәсми ҡағыҙ*); **писа́ть тре́бование** требование яҙыу

**ТРЕ́БОВАТЕЛЬНОСТЬ** *ж* талапсанлыҡ; **прояви́ть тре́бовательность** талапсанлыҡ күрһәтеү

**ТРЕ́БОВАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*строгий, взыскательный*) талапсан, талап итеүсән, талапты ҡаты ҡуйыусан; **тре́бовательный учи́тель** талапсан уҡытыусы **2.** (*разборчивый*) талапсан, айыра белеүсе; **тре́бовательный чита́тель** талапсан уҡыусы

**ТРЕ́БОВАТЬ** *несов.* **1.** талап итеү, һорау, даулау, талап итеп даулау; **тре́бовать объясне́ний** аңлатмалар талап итеү; **тре́бовать свобо́ды** ирек даулау **2.** *чего, от кого-чего* талап итеү; **зако́н тре́бует** закон талап итә **3.** *чего* (*нуждаться*) кәрәк (булыу); **дом тре́бует ремо́нта** өйгә ремонт кәрәк

**ТРЕ́БОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** талап ителеү, кәрәк (булыу); **заво́ду тре́буются рабо́чие** заводҡа эшселәр кәрәк **2.** *безл.* (*необходимо, нужно*) кәрәк ине; **что и тре́бовалось доказа́ть** ошоно иҫбат итеү кәрәк тә ине **3.** *страд. от* **тре́бовать** 1

**ТРЕБУХА́** *ж* эсәк-ҡарын (*һуйылған малдың*)

**ТРЕВО́ГА** *ж* **1.** (*беспокойство, волнение*) шомланыу, ҡурҡыу, хәүеф, шом, хафа, борсоу; **быть в трево́ге** шомланып тороу **2.** (*переполох*) шау-шыу, ғауға; **в до́ме подняла́сь трево́га** өйҙә шау-шыу ҡупты **3.** (*знак опасности*) тревога;



17 зак. 2.0007.06

**пожа́рная трево́га** янғын (ут) тревогаһы; **сигна́л трево́ги** тревога сигналы ♦ **бить трево́гу** тауыш күтәреү (*ҡурҡынысты белдереү*)

**ТРЕВО́ЖИТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* борсоу, тынғыһыҙлау, хафалау; **состоя́ние больно́й трево́жит** ауырыуҙың хәле борсой **2.** *кого-что* (*нарушать покой*) борсоу, тынысһыҙлау, мәшәҡәтләү; **не трево́жьте его́** уны борсомағыҙ **3.** (*причинять боль, беспокоить*) яфалау, маҙаһыҙлау; **меня́ трево́жит ста́рая ра́на** мине элекке яра яфалай

**ТРЕВО́ЖИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*волноваться*) борсолоу, тынысһыҙланыу, хафаланыу; **трево́житься за дете́й** балалар өсөн борсолоу **2.** *страд. от* **трево́жить** 2, 3

**ТРЕВО́ЖНОСТЬ** *ж* ҡурҡыныслыҡ, хәүефлелек, борсоулы (шомло) булыу; **трево́жность положе́ния** хәлдең хәүефлелеге

**ТРЕВО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*полный тревоги, волнения*) шомло, хафалы, хәүефле, борсоулы; **трево́жный го́лос** борсоулы тауыш **2.** (*порождающий тревогу*) ҡурҡыныс белдереүсе, шомло, шөбһәле; **трево́жные слу́хи** шомло хәбәрҙәр; **трево́жная тишина́** шөбһәле тынлыҡ **3.** (*извещающий об опасности*) тревога ...ы; **трево́жный сигна́л** тревога сигналы

**ТРЕВОЛНЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* тыныслыҡты юғалтыу, ныҡ борсолоу, хафаға төшөү, шомланыу, ҡурҡыу, тынысһыҙланыу

**ТРЕГЛА́ВЫЙ** и **ТРЁХГЛА́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** өс көмбәҙле; **трегла́вая це́рковь** өс көмбәҙле сиркәү **2.** өс башлы (*әкиәттәрҙә*); **трёхгла́вый драко́н** өс башлы аждаһа

**ТРЕ́ЗВЕННИК** *м*; *разг.* (араҡы) эсмәй торған кеше, айыҡ (айнык) кеше

**ТРЕЗВЕ́ТЬ** *несов.* айныу, айығыу, айный барыу

**ТРЕЗВИ́ТЬ** *несов. кого* айныҡтырыу, айыҡтырып ебәреү

**ТРЕЗВО́Н** *м* **1.** (*звон во все колокола*) бөтә ҡыңғырауҙарҙы бер юлы ҡағыу (*сиркәүҙә*) **2.** *перен.*, *разг.* (*толки, сплетни*) юҡ-бар, имеш-мимеш (*хәбәр*) **3.** *перен.*, *разг.* (*шум, скандал*) шау-шыу, ғауға **4.** (*звонкое пение птиц*) ҡоштарҙың яңғырауыҡлы тауыштары ♦ **трезво́н в уша́х** ҡолаҡ сыңлауы

**ТРЕЗВО́НИТЬ** *несов.* **1.** (*звонить во все колокола*) ҡыңғырауҙарҙы бер юлы ҡағыу (*сиркәүҙә*) **2.** (*сильно звонить*) (бик ныҡ) шылтырау (зыңғырлау) **3.** *что* и *без доп.*; *перен.*, *разг.* (*распускать слухи*) шаулау, хәбәр таратыу

**ТРЕ́ЗВОСТЬ** *ж*; *прям.*, *перен.* айныҡлыҡ, айыҡлыҡ; **о́бщество тре́звости** айыҡлыҡ йәмғиәте; **тре́звость сужде́ний** фекер айыҡлығы

**ТРЕ́ЗВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*не пьяный*) айыҡ, айыҡҡан, айныҡ; **быть тре́звым** айныҡ булыу **2.** (*не пьющий*) араҡы эсмәй торған **3.** сәләмәт, һау, айыҡ (*аҡыл, ҡараш тураһында*); **тре́звый ум** айыҡ аҡыл

**ТРЕЗУ́БЕЦ** *м* өс теш (*өс йәпле бороңғо ҡорал*)

**ТРЕК** *м* трек, уҙышыу юлы (*велосипед, мотоцикл өсөн*)

**ТРЕЛЕВА́ТЬ** *несов.*; *спец.* ағас тарттырыу; **трелева́ть лес на тра́кторе** трактор менән ағас тарттырыу

**ТРЕЛЁВКА** *ж*; *спец. см.* **трелева́ть**; **механизи́ровать трелёвку ле́са** ағас тарттырыуҙы механизациялау

**ТРЕЛЁВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* ағас тарттырыу ...ы, ағас тарттыра торған; **трелёвочный тра́ктор** ағас тарттыра торған трактор

**ТРЕЛЬ I** *ж* (*птицы*) сут-сут итеү; (*свистка*) һыҙғырыу; (*звонка*) сыңғырлау, зыңғырлау, сыңғыр-сыңғыр итеү; **соловьи́ная трель** һандуғастың сут-сут итеп һайрауы

**ТРЕЛЬ II** *ж*; *спец.* ағас тарттырыу юлы (урыны)

**ТРЕЛЬЯ́Ж** *м* трельяж (**1.** *өс бүлекле көҙгө* **2.** *үрмәләүсе үҫемлектәр өсөн ҡуйылған рәшәткә*)

**ТРЕНА́Ж** *м*; *спец.* тренаж (*күнекмәләр системаһы*)

**ТРЕНАЖЁР** *м* тренажёр (*күнекмәләр яһау өсөн ҡоролма*); **трениро́вка космона́втов на тренажёрах** космонавтарҙың тренажёрҙарҙа күнегеүҙәре

**ТРЕ́НЕР** *м* тренер; **тре́нер по пла́ванию** йөҙөү буйынса тренер; **тре́нер кома́нды** команда тренеры

**ТРЕ́НЕРСКИЙ,** -ая, -ое тренер(ҙар) ...ы, тренерлыҡ ...ы; **тре́нерская рабо́та** тренерлыҡ эше; **тре́нерская шко́ла** тренерҙар мәктәбе

**ТРЕ́НЗЕЛЬ** *м* ауыҙлыҡ, ауыҙлыҡ сынйыры (*ауыҙлыҡтың бер төрө*)

**ТРЕ́НИЕ** *с* **1.** ышҡылыу, өйкәлеү; **си́ла тре́ния** ышҡылыу көсө; **вну́треннее тре́ние** эске ышҡылыу **2.** *обычно мн.* **тре́ния**; *перен.* ыҙғыш, талаш, тартыш

**ТРЕ́НИНГ** *м*; *спец.* тренинг (*махсус күнекмәләр үтеү*); **аутоге́нный тре́нинг** аутоген тренинг (*үҙ-үҙеңде инандырыу*)

**ТРЕНИРО́ВАННОСТЬ** *ж* өйрәтелгәнлек, өйрәнгәнлек, күнеккәнлек

**ТРЕНИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **тренирова́ть 2.** *прил.* күнеккән, өйрәнгән, өйрәтелгән; **трениро́ванный футболи́ст** күнеккән футболсы

**ТРЕНИРОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*обучать*) өйрәтеү; **тренирова́ть спортсме́нов** спортсыларҙы өйрәтеү **2.** *что* (*упражнять*) күнектереү, өйрәтеү; **тренирова́ть па́мять** хәтерҙе күнектереү

**ТРЕНИРОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** күнекмә (күнегеү) үткәреү, күнегеү, өйрәнеү; **тренирова́ться в бе́ге** йүгереүҙә күнегеү **2.** *страд. от* **тренирова́ть**

**ТРЕНИРО́ВКА** *ж* тренировка, күнегеү, күнекмә, өйрәнеү; **ходи́ть на трениро́вки** күнекмәләргә йөрөү; **трениро́вка в бе́ге** йүгереү күнекмәләре

**ТРЕНИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тренировка ...ы; **трениро́вочный костю́м** тренировка костюмы **2.** тренировка ...ы, өйрәнеү (күнегеү) ...ы,

күнекмә үткәреү ...ы; **трениро́вочный зал** күнекмә үткәреү залы; **трениро́вочный самолёт** өйрәнеү самолёты

**ТРЕНО́ГА** *ж* **1.** *см.* **трено́жник 2.** (*путы для лошадей*) кешән; **спу́тать трено́гой ло́шадь** кешән менән ат кешәнләү

**ТРЕНО́ГИЙ** и **ТРЁХНО́ГИЙ,** -ая, -ое *разг.* өс аяҡлы; **трено́гий стол** өс аяҡлы өҫтәл

**ТРЕНО́ЖИТЬ** *несов. кого-что* кешәнләү, тышау(лау)

**ТРЕНО́ЖНИК** *м* өстаған, өсаяҡ; **поста́вить чугу́н на трено́жник** өстағанға суйын ҡуйыу

**ТРЕ́НЬКАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** теңкелдәү, деңкелдәү, дыңҡылдау, теңкел-теңкел килеү; **тре́нькает балала́йка** балалайка теңкел-теңкел килә **2.** *на чём* (*бренчать*) дыңғырлатыу, зымбырлатыу, сиртеү

**ТРЕПА́К** *м* трепак (*урыҫ халыҡ бейеүе һәм шуға яҙылған музыка әҫәре*)

**ТРЕПА́ЛКА** *ж* талҡы, ҡаҡҡы (*етен, тарма сүсен, йөндө таҙартыу ҡоралы*)

**ТРЕПА́ЛО** *с см.* **трепа́лка**

**ТРЕПА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тәрәпләү ...ы, талҡыу ...ы, тетеү ...ы; **трепа́льная маши́на** тәрәпләү машинаһы

**ТРЕПА́ЛЬЩИК** *м* и **ТРЕПА́ЛЬЩИЦА** *ж* тәрәпләүсе, талҡыусы

**ТРЕПА́Н** *м* трепан (*хирургтарҙың һөйәк тишеү ҡоралы*)

**ТРЕПАНА́ЦИЯ** *ж*; *мед.* трепанация (*һөйәк ҡыуышлығына тишеп үтеү операцияһы*); **трепана́ция че́репа** баш һөйәген трепанациялау

**ТРЕПА́НГ** *м* трепанг (*Алыҫ Көнсығыштағы диңгеҙҙәрҙә йәшәүсе хайуан*)

**ТРЕПАНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *мед.* трепанациялау, трепанация яһау; **трепани́ровать че́реп больно́го** ауырыуҙың баш һөйәгенә трепанация яһау

**ТРЁПАННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **трепа́ть**

**ТРЁПАНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *спец.* талҡыған, талҡылған; **трёпаный лён** талҡыған етен **2.** *разг.* таушалған, туҙған, йыртылған, йыртылып бөткән; **трёпаная кни́га** туҙған китап **3.** *разг.* туҙғыған, таралмаған; **трёпаные во́лосы** туҙғыған сәс

**ТРЕПА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого* (*теребить, дёргать*) тартыу, йолҡоу, тартҡылау; **трепа́ть бо́роду** һаҡалды тартҡылау **2.** (*похлопывать, поглаживать*) һыйпау, (һөйөп) ҡағыу, (тыпылдатып) һөйөү **3.** *что*; *разг.* (*изнашивать*) туҙҙырыу, таушалдырыу, ылбыратыу **4.** *кого*; *разг.* ҡалтыратыу, дерелдәтеү; **её тре́плет лихора́дка** уны биҙгәк дерелдәтә **5.** *что*; *разг.* (*о ветре*) елберләтеү, туҙҙырыу, таратыу; **ве́тер тре́плет во́лосы** ел сәсте туҙҙыра **6.** *что*; *с.-х.* тәрәпләү, талҡыу; (*о шерсти*) тетеү **7.** тартыу; **трепа́ть за́ уши** ҡолаҡтан тартыу ♦ **трепа́ть языко́м** лығырлау, сүбәк сәйнәү; **трепа́ть не́рвы** ҡан боҙоу, теңкәгә тейеү

**ТРЕПА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*развеваться*) елберләү, туҙғыу, һелкенеү **2.** (*изнашиваться*) туҙыу, таушалыу, ылбырау; **о́бувь тре́плется** аяҡ кейеме туҙа **3.** *груб., прост.* юҡ-барҙы һөйләү **4.** *страд. от* **трепа́ть** 1—3, 5—7

**ТРЕПА́Ч** *м*; *груб., прост.* лығырлаҡ (кеше), бушбоғаҙ

**ТРЕ́ПЕТ** *м* **1.** (*мелкая дрожь*) дерелдәү, ҡалтырау, ҡалтыраныу; **тре́пет ли́стьев** япраҡтарҙың дерелдәүе **2.** *перен.* (*страх, ужас*) ҡот осоп тороу, тетрәү, ҡалтырау

**ТРЕПЕТА́НИЕ** *с см.* **трепета́ть**

**ТРЕПЕТА́ТЬ** *несов.* **1.** (*колебаться, дрожать*) дерелдәү, тетрәү, ҡалтырау; (*о знамени*) елберләү **2.** *за кого-что* и *без доп.*; *перен.* (*тревожиться*) ҡот осоп тороу, ҡалтырау, ҡалтыраныу; **трепета́ть за свои́х дете́й** балаларың өсөн ҡот осоп тороу **3.** (*испытывать волнение*) тулҡынланыу, ашҡыныу, лепелдәү; **се́рдце трепе́щет от ра́дости** шатлыҡтан йөрәк лепелдәй **4.** *перед кем-чем*; *перен.* (*испытывать страх*) ҡалтырап (ҡурҡып) тороу, ҡурҡыу

**ТРЕ́ПЕТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*дрожащий, колеблющийся*) ем-ем итеп торған, емелдәгән, елпелдәп торған; (*о знамени*) елберләгән, елберләп торған; **тре́петный свет свечи́** шәмдең емелдәгән яҡтыһы **2.** (*прерывающийся — о голосе, звуках*) ҡалтыраған, ҡалтыраулы, ҡалтыраҡ, тулҡынланған; **тре́петный го́лос** ҡалтыраған тауыш; **3.** болоҡһоған, йөрәкһегән, тулҡынланған; **тре́петное чу́вство** йөрәкһегән хистәр

**ТРЁПКА** *ж*; *прост.* **1.** *см.* **трепа́ть** 1, 2, 6; **2.** (*побои, наказание*) туҡмау, шелтәләү, орошоу

**ТРЕПЫХА́ТЬ** *несов.*; *разг. см.* **трепыха́ться**

**ТРЕПЫХА́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** (*дёргаться*) бәрелеп-һуғылыу, тырпырау; **ры́ба трепыха́ется на берегу́** балыҡ яр башында тырпырап ята **2.** (*дрожать*) ҡалтырау, һелкенеү; **дере́вья трепыха́ются** ағастар һелкенә

**ТРЕСК** *м* **1.** шарт-шорт килеү, шатырлау; **треск мото́ров** мотор шатырлауы; **с тре́ском лома́ется сук** ботаҡ шатырлап һына **2.** *перен., разг.* (*шумиха*) шау-шыу, шаулау, шапырыныу ♦ **с тре́ском провали́ться** хур булыу

**ТРЕСКА́** *ж* тәрәс, тәрәс балығы, треска

**ТРЕ́СКАНИЕ** *с см.* **тре́скаться** I

**ТРЕ́СКАТЬСЯ I** *несов.* сатнау, ярылыу, шартлау; **лёд тре́скается** боҙ ярыла

**ТРЕ́СКАТЬСЯ II** *несов. см.* **тре́снуться**

**ТРЕСКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәрәс ...ы, треска ...ы, тәрәс балығы ...ы; **треско́вый жир** треска майы **2.** *в знач. сущ.* **треско́вые** *мн.*; *зоол.* треска һымаҡтар

**ТРЕСКОТНЯ́** *ж*; *разг.* **1.** (*непрерывный треск*) шатырлап тороу, шатыр-шотор килеү, тырылдап тороу; **трескотня́ пи́шущих маши́нок** яҙыу машиналарының шатырлауы **2.** *перен.* (*болтовня*) туҡтауһыҙ һөйләнеү, лағыр-лоғор килеү, сатырлау

**ТРЕСКУ́ЧИЙ,** -ая, -ее *прям.*, *перен.* яңғырауыҡлы, шау-шыулы; **трескучий уда́р гро́ма** күк күкрәүенең яңғырауыҡлы тауышы; **треску́чие фра́зы** яңғырауыҡлы һүҙҙәр ♦ **треску́чий моро́з** сатнама һыуыҡ, ҡаты һыуыҡ

**ТРЕ́СНУТЫЙ,** -ая, -ое ярыҡ; (*в разных местах*) ярыҡ-йороҡ; **тре́снутое бревно́** ярыҡ бүрәнә

**ТРЕ́СНУТЬ** *сов.* **1.** сатнау, шартлау, ярылыу; (*о коже*) ярылыу; **ко́жа на рука́х тре́снула** ҡулдың тиреһе ярылды; **ча́шка тре́снула** сынаяҡ сатнаған; **земля́ тре́снула от моро́за** ер һыуыҡтан ярылған **2.** *кого-что* и *без доп.*; *прост.* (*ударить*) һуғып ебәреү, ҡундырып алыу, тондороу **3.** шарт итеү; **вдруг тре́снула ве́тка** ҡапыл ботаҡ шарт итте ♦ **хоть тре́сни** *прост.* шартлаһаң да (булмай)

**ТРЕ́СНУТЬСЯ** *сов.*; *прост.* бәрелеү, һуғылыу; **тре́снуться лбом о де́рево** маңлай менән ағасҡа бәрелеү

**ТРЕСТ** *м* трест (**1.** *бер типтағы продукция эшләп сығара торған дәүләт предприятиелары берләшмәһе* **2.** *иҡт. бер нисә предприятиеның монополистик берләшмәһе*)

**ТРЕСТА́** *ж*; *с.-х.* талҡымаған етен (киндер)

**ТРЕ́СТОВСКИЙ,** -ая, -ое трест ...ы; **тре́стовский капита́л** трест капиталы

**ТРЕТЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое третей ...ы (*дәғүәләшеүсе ике яҡтың үҙ-ара килешеүе буйынса һайланған өсөнсө яҡ*); **трете́йский суд** третей суды

**ТРЕ́ТИЙ,** -ья, -ье **1.** *числ.* өсөнсө; **тре́тья страни́ца** өсөнсө бит; **в тре́тий раз** өсөнсө тапҡыр **2.** *в знач. сущ.* **тре́тья** *ж* өстән бер; **две тре́тьих** өстән ике **3.** *в знач. сущ.* **тре́тье** *с* (*сладкое блюдо*) өсөнсө, өсөнсө блюдо; **на тре́тье — компо́т** өсөнсө блюдоға — компот **4.** (*беспристрастный*) битараф, бер яҡлы ла булмаған; **он в э́том де́ле тре́тья сторона́** был эшкә ул битараф кеше **5.** *в знач. вводн. сл.* **тре́тье**; *уст.*, *разг. см.* **в-тре́тьих** ♦ **тре́тьего дня** элекке, элгәрге көн; **из тре́тьих рук** кеше арҡыры; **тре́тьи петухи́** таң тишеге, өсөнсө әтәс

**ТРЕТИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* эре ҡыланыу, өҫтән (кәмһетеп) ҡарау

**ТРЕТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** өсөнсө, өсөнсөл; **трети́чный пери́од боле́зни** ауырыуҙың өсөнсө периоды **2.** *геол.* өсөнсө; **трети́чный пери́од** өсөнсө осор (*геологияла кайназой дәүеренең беренсе осоро менән бәйле*)

**ТРЕТЬ** *ж* өстән бер, өстән бер өлөш; **треть го́да** йылдың өстән бере

**ТРЕТЬЕ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "өсөнсө" мәғәнәһендә ҡулланылған тәүге өлөшө, мәҫ.*, **третьесо́ртный** өсөнсө сортлы

**ТРЕТЬЕГОДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое өс йыллыҡ

**ТРЕТЬЕКЛА́ССНИК** *м* и **ТРЕТЬЕКЛА́ССНИЦА** *ж* өсөнсө синыф уҡыусыһы, өсөнсө синыфта уҡыусы

**ТРЕТЬЕКУ́РСНИК** *м* и **ТРЕТЬЕКУ́РСНИЦА** *ж* өсөнсө курс студенты, өсөнсө курста уҡыусы студент

**ТРЕТЬЕСТЕПЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*малозначительный*) өсөнсө дәрәжәләге, уртаса **2.** (*посредственный*) уртаса, урта ҡул; **третьестепе́нный актёр** урта ҡул актёр

**ТРЕУГО́ЛКА** *ж* треуголка, өс мөйөшлө эшләпә (*революцияға тиклем Рәсәй хәрбиҙәре кейгән*)

**ТРЕУГО́ЛЬНИК** *м* **1.** (*геометрическая фигура*) өсмөйөш, өскөл; **прямоуго́льный треуго́льник** тура мөйөшлө өсмөйөш; **равносторо́нний треуго́льник** тигеҙ яҡлы өсмөйөш **2.** *чего* (*предмет*) өсмөйөшлө (*нәмә*); **треуго́льник письма́** өсмөйөшлө хат **3.** (*музыкальный инструмент*) өсмөйөш; **зазвене́л треуго́льник** өсмөйөш дыңғырлай башланы

**ТРЕУГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое өсмөйөшлө, өскөл; **треуго́льная пирами́да** өсмөйөшлө пирамида; **треуго́льное письмо́** өскөл хат

**ТРЕУ́Х** *м* ҡолаҡсын (бүрек), ҡолаҡлы бүрек

**ТРЕ́ФОВЫЙ** и **ТРЕФО́ВЫЙ,** -ая, -ое *карт.* треф ...ы, треф; **трефо́вый коро́ль** треф короле; **трефо́вая семёрка** треф етелек

**ТРЕ́ФЫ** *мн.* (*ед.* **тре́фа** *ж*); *карт.* треф

**ТРЁХ...** *см.* **тре...**

**ТРЁХБА́ЛЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** өс баллы; **трёхба́лльный ве́тер** өс баллы ел **2.** өс балға нигеҙләнгән; **трёхба́лльная систе́ма** өс балға нигеҙләнгән система

**ТРЁХГОДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое өс йыллыҡ, өс йыл; **трёхгоди́чное обуче́ние** өс йыллыҡ уҡыу

**ТРЁХГОДОВА́ЛЫЙ,** -ая, -ое өс йәшлек, өс йәштәге; **трёхгодова́лый бык** өс йәшлек үгеҙ

**ТРЁХГОЛО́СНЫЙ,** -ая, -ое өс тауышлы, өс тауыш өсөн яҙылған; **трёхголо́сная фу́га** өс тауыш өсөн яҙылған фуга

**ТРЁХГРА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** өс ҡырлы; **трёхгра́нный напи́льник** өс ҡырлы игәү **2.** *мат.* өс яҡлы; **трёхгра́нный у́гол** өс яҡлы мөйөш

**ТРЁХДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое өс көнлөк, өс көн; **в трёхдне́вный срок** өс көн эсендә

**ТРЁХДЮЙМО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** өс дюймлы; **трёхдюймо́вое ору́дие** өс дюймлы туп **2.** өс дюйм ҡалынлыҡтағы (киңлектәге, бейеклектәге); **трёхдюймо́вая доска́** өс дюйм ҡалынлыҡтағы таҡта

**ТРЁХЗНА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое өс урынлы; **трёхзна́чное число́** өс урынлы һан

**ТРЁХКЛА́ССНЫЙ,** -ая, -ое өс синыфлы (класлы); **трёхкла́ссная шко́ла** өс синыфлы мәктәп

**ТРЁХКОЛЁСНЫЙ,** -ая, -ое өс тәгәрмәсле (ҡуласалы); **трёхколёсный велосипе́д** өс тәгәрмәсле велосипед

**ТРЁХКОПЕ́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое өс тинлек, өс тинле; **трёхкопе́ечная моне́та** өс тинлек аҡса

**ТРЁХКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое өс тапҡыр; **плати́ть в трёхкра́тном разме́ре** өс тапҡыр арттырып түләү

**ТРЁХЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) өс йыл **2.** (*годовщина*) өс йыллыҡ, өс йыл тулыу; **отме́тить трёхле́тие шко́лы** мәктәптең өс йыллығын билдәләү

**ТРЁХЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** өс йыллыҡ, өс йылға барған; **трёхле́тний план** өс йыллыҡ план **2.** (*о возрасте*) өс йәшлек (йәштәге); **трёхле́тний ребёнок** өс йәшлек бала

**ТРЁХЛЕ́ТОК** *м* и **ТРЁХЛЕ́ТКА** *ж*; *разг.* **1.** (*кто-что-л. в возрасте трёх лет*) өс йәшлек **2.** өс йыллыҡ; **шко́ла-трёхле́тка** өс йыллыҡ мәктәп

**ТРЁХЛИНЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое өс линиялы (*калибры 7,6 мм*); **трёхлине́йная винто́вка** өс линиялы винтовка (мылтыҡ)

**ТРЁХМА́ЧТОВЫЙ,** -ая, -ое өс мачталы; **трёхма́чтовый кора́бль** өс мачталы карап

**ТРЁХМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *спец.* өс үлсәүле (*иңе, буйы, бейеклеге булған*); **трёхме́рная дета́ль** өс үлсәүле деталь **2.** *муз.* өс бүлемле; **трёхме́рный такт** өс бүлемле такт

**ТРЁХМЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое өс урынлы, өс кешелек; **трёхме́стная каю́та** өс урынлы каюта

**ТРЁХМЕ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое өс айлыҡ, өс айға һуҙылған; **трёхме́сячный ребёнок** өс айлыҡ бала

**ТРЁХНЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое өс аҙналыҡ, өс аҙнаға һуҙылған; **трёхнеде́льный о́тпуск** өс аҙналыҡ ял

**ТРЁХНО́ГИЙ,** -ая, -ое *см.* **трено́гий**

**ТРЁХПА́ЛЫЙ,** -ая, -ое өс бармаҡлы; **трёхпа́лая рука́** өс бармаҡлы ҡул

**ТРЁХПО́ЛЬЕ** *с*; *с.-х.* өс баҫыу системаһы, өс баҫыулы сәсеү әйләнеше

**ТРЁХПО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое өс баҫыулы; **трёхпо́льный севооборо́т** өс баҫыулы сәсеү әйләнеше

**ТРЁХПРОЦЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое өс процентлы; **трёхпроце́нтный заём** өс процентлы заём

**ТРЁХРА́ЗОВЫЙ,** -ая, -ое өс тапҡыр(лы); **трёхра́зовое пита́ние** өс тапҡыр ашатыу

**ТРЁХРУБЛЁВКА** *ж*; *разг.* өслөк (*аҡса*)

**ТРЁХРЯ́ДКА** *ж*; *разг.* өс рәтле гармун

**ТРЁХСЛО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* өс ижекле; **трёхсло́жное сло́во** өс ижекле һүҙ

**ТРЁХСМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое өс сменалы; **трёхсме́нная рабо́та** өс сменалы эш

**ТРЁХСОТЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) өс йөҙ йыл **2.** (*годовщина*) өс йөҙ йыллыҡ, өс йөҙ йыл тулыу; **трёхсотле́тие го́рода** ҡаланың өс йөҙ йыллығы

**ТРЁХСОТЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) өс йөҙ йыл(ға) барған **2.** (*о годовщине*) өс йөҙ йыллыҡ, өс йөҙ йыл тулыу(ға арналған); **трёхсотле́тний дуб** өс йөҙ йыллыҡ имән

**ТРЁХСО́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* өс йөҙөнсө

**ТРЁХСТВО́ЛКА** *ж*; *разг.* өс көбәкле мылтыҡ

**ТРЁХСТВО́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое өс ҡапҡаслы (япҡыслы), өс ишекле; **трёхство́рчатый шкаф** өс ишекле шкаф

**ТРЁХСТО́ПНЫЙ,** -ая, -ое *лит.* өс быуынлы, өс стопалы; **трёхсто́пный стих** өс быуынлы шиғыр

**ТРЁХСТОРО́ННИЙ,** -яя, -ее **1.** (*имеющий три стороны*) өс яҡлы **2.** (*происходящий с участием трёх сторон*) өс яҡ ҡатнашҡан; **трёхсторо́нний догово́р** өс яҡ ҡатнашҡан килешеү

**ТРЁХСТРУ́ННЫЙ,** -ая, -ое өс ҡыллы; **трёхстру́нная балала́йка** өс ҡыллы балалайка

**ТРЁХСТУПЕ́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*имеющий три ступени*) өс баҫҡыслы (киртләсле) **2.** (*состоящий из трёх ступеней, частей*) өс быуынлы; **трёхступе́нчатая раке́та** өс быуынлы ракета

**ТРЁХСУ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое өс тәүлеклек; **трёхсу́точный похо́д** өс тәүлеклек сәйәхәт

**ТРЁХТА́КТНЫЙ,** -ая, -ое *муз., тех.* өс тактлы

**ТРЁХТО́МНИК** *м*; *разг.* өс томлыҡ (*баҫма*)

**ТРЁХТО́МНЫЙ,** -ая, -ое өс томлы; **трёхто́мный рома́н** өс томлы роман

**ТРЁХТО́НКА** *ж*; *разг.* өс тонналыҡ йөк машинаһы

**ТРЁХТО́ННЫЙ,** -ая, -ое өс тонналы; **трёхто́нный груз** өс тонналы йөк

**ТРЁХТЫ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *числ.* өс меңенсе; **трёхты́сячный но́мер** өс меңенсе һан **2.** *разг.* (*стоимостью в три тысячи*) өс мең һумлыҡ, өс меңлек **3.** (*состоящий из трёх тысяч единиц*) өс меңлек; **трёхты́сячный отря́д** өс меңлек отряд

**ТРЁХФА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое өс фазалы (**1.** *эл. үҙгәреүсән ток менән бәйле* **2.** *фәлс. өс этаптан тороу*) ♦ **трёхфа́зный ток** өс фазалы ток

**ТРЁХЦВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое өс төҫлө, өс буяулы, өс төҫтәге; **трёхцве́тное зна́мя** өс төҫтәге байраҡ

**ТРЁХЧАСОВО́Й,** -ая, -ое **1.** өс сәғәтлек, өс сәғәткә һуҙылған; **трёхчасово́й разгово́р** өс сәғәткә һуҙылған һөйләшеү **2.** *разг.* (*назначенный на три часа*) сәғәт өскә билдәләнгән, сәғәт өстәге; **трёхчасово́й по́езд** сәғәт өстәге поезд

**ТРЁХЧЛЕ́Н** *м*; *мат.* өсбыуын

**ТРЁХЧЛЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *мат.* өсбыуынлы, өс быуындан торған; **трёхчле́нное уравне́ние** өсбыуынлы тигеҙләмә

**ТРЁХЪЯЗЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** өс телле, өс телдә төҙөлгән; **трёхъязы́чный слова́рь** өс телдә төҙөлгән һүҙлек **2.** өс телле, өс телдә һөйләшә торған; **трёхъязы́чное населе́ние** өс телдә һөйләшә торған халыҡ

**ТРЁХЭТА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое өс ҡатлы; **трёхэта́жный дом** өс ҡатлы йорт

**ТРЁШКА** *ж*; *прост. см.* **трёхрублёвка**; **разменя́ть на трёшки** өслөктәргә алмаштырыу

**ТРЁШНИЦА** *ж*; *прост. см.* **трёхрублёвка**

**ТРЕЩА́ТЬ** *несов.* **1.** (*издавать треск*) шатырлау, шытырлау, шатыр-шотор килеү; **лёд треща́т** боҙ шатырлай **2.** (*издавать резкие, сухие звуки, похожие на треск*) сырылдау, сытырлау, сатырлап тороу; **кузне́чики треща́т в траве́** сиңерткәләр үлән араһында сырылдай **3.** *перен., разг.* (*болтать*) лаҡылдау, лыҡылдау, сатырлау **4.** *перен.* (*сильно болеть — о голове*) сатнау,

ярылып (сатнап) барыу ♦ **трещáть по всем швам** *см.* **шов**

**ТРÉЩИНА** *ж* **1.** ярыҡ, сатнаған урын; **сквознáя трéщина** үтәләй ярыҡ; **трéщина в стенé** стеналағы ярыҡ; **трéщина на чáшке** сынаяҡтың сатнаған урыны **2.** *перен.* (*разлад*) боҙолоу; **трéщина в отношéниях** мөнәсәбәттәр боҙолоу

**ТРЕЩÓТКА** *ж* **1.** (*игрушка*) шылтырауыҡ уйынсыҡ **2.** шаҡылдауыҡ, шаҡылдаҡ, шалтыраҡ; **трещóтка стóрожа** ҡарауылсының шаҡылдауығы **3.** тимер бырауы, тимер тишкесе (*слесарь ҡоралы*) **4.** *перен., разг.* лаҡылдаҡ, лыҡылдаҡ, лабырлаҡ (*күп һөйләүсән кешегә ҡарата*)

**ТРИ** *числ.* өс; **три рáза** өс мәртәбә; **три человéка** өс кеше

**ТРИ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "өс", "өслө", "өслөк", "өсләтә" мәғәнәләрен биргән беренсе өлөшө, мәҫ.*, **триеди́ный** өс яҡлы

**ТРИÁДА** *ж* **1.** *книжн.* триада, өс таған (*өс айырым киҫәктән, өлөштән торған берҙәмлек*) **2.** триада (*Гегель фәлсәфәһендә идеяның өс баҫҡыслы үҫеше: тезис, антитезис, синтез*)

**ТРИÁСОВЫЙ: триáсовый пери́од** *геол.* триас осоро (*мезозой дәүеренең беренсе осоро*)

**ТРИБÚН** *м* трибун (**1.** *тар. Боронғо Римда төрлө вазифалы хеҙмәткәрҙәрҙең атамаһы* **2.** *күсм. күренекле йәмәғәт эшмәкәре, оратор*)

**ТРИБÚНА** *ж*; *в разн. знач.* трибуна; **произноси́ть речь с трибúны** трибунанан телмәр тотоу; **газéта — трибúна нарóда** гәзит — халыҡ трибунаһы; **лéвые трибúны** һул трибуналар

**ТРИБУНÁЛ** *м* трибунал (*хәрбиҙәрҙе һәм ҡаты енәйәтселәрҙе хөкөм итеү өсөн махсус орган*); **воéнный трибунáл** хәрби трибунал; **отдáть под трибунáл** трибунал ҡарамағына биреү

**ТРИВИÁЛЬНОСТЬ** *ж* күп сәйнәлгәнлек (тылҡылғанлыҡ)

**ТРИВИÁЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күп сәйнәлгән (тылҡылған); **тривиáльная мысль** күп сәйнәлгән фекер

**ТРИГОНОМЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тригонометрия ...ы, тригонометрик; **тригонометри́ческие табли́цы** тригонометрик таблицалар **2.** *геод.* тригонометрик; **тригонометри́ческий знак** тригонометрик знак ♦ **тригонометри́ческие фýнкции** *мат.* мөйөш функциялары

**ТРИГОНОМÉТРИЯ** *ж* тригонометрия (*геометрияның бер бүлеге*)

**ТРИДЕВЯ́ТЫЙ: тридевя́тое цáрство** *трад.-поэт.* Ҡаф тау артында, ете диңгеҙ артында, ер сигендә

**ТРИ́ДЕВЯТЬ: за три́девять земéль** *трад.-поэт.* ер аяғы, ер башы; йәһәннәм аръяғы (арты)

**ТРИДЦАТИЛÉТИЕ** *с* **1.** (*срок*) утыҙ йыл **2.** (*о годовщине*) утыҙ йыллыҡ, утыҙ йәшлек

**ТРИДЦАТИЛÉТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*срок*) утыҙ йыл, утыҙ йыллыҡ **2.** (*о годовщине*) утыҙ йыллыҡ **3.** (*о возрасте*) утыҙ йәшлек, утыҙҙағы

**ТРИДЦÁТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* утыҙынсы; **тридцáтые гóды** утыҙынсы йылдар

**ТРИ́ДЦАТЬ** *числ.* утыҙ; **три́дцать человéк** утыҙ кеше

**ТРИЕДИ́НЫЙ,** -ая, -ое өс өлөштән торған, өс яҡлы, өс нәмәнән ғибәрәт; **триеди́ная задáча** өс нәмәнән ғибәрәт бурыс

**ТРИ́ЕР** *м* триер (*орлоҡ таҙарта, төрҙәргә айыра торған машина*)

**ТРИ́ЖДЫ** *нареч.* **1.** өс тапҡыр (мәртәбә, ҡат); **сказáть три́жды** өс ҡат әйтеү **2.** өсөң, өс тапҡыр; **три́жды три — дéвять** өс өсөң туғыҙ

**ТРИ́ЗНА** *ж* тризна (**1.** *боронғо славяндарҙа үлгән кешене күмеү йолаһы, аҙағында уйындар, ярыштар һәм мәжлес* **2.** *кит. вафат булған кешене иҫкә алыу мәжлесе*)

**ТРИКÓ** *с нескл.* трико (**1.** *йөн туҡыма* **2.** *тәнгә һылашып торған трикотаж кейем* **3.** *ҡатын-ҡыҙҙар өсөн трикотаж панталондар*)

**ТРИКОТÁЖ** *м* трикотаж (*машинала бәйләнгән туҡыма һәм шунан тегелгән нәмәләр*)

**ТРИКОТÁЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** трикотаж ...ы; **трикотáжная фáбрика** трикотаж фабрикаһы **2.** бәйләм, трикотаждан эшләнгән; **трикотáжная рубáшка** бәйләм күлдәк

**ТРИЛИ́СТНИК** *м* **1.** *бот.* өсъяпраҡ (*туҡранбаштың бер төрө*) **2.** (*лист тройчатого строения*) өсәрле япраҡ **3.** *спец.* өсәрле япраҡ һүрәте

**ТРИЛЛИÓН** *числ.* триллион (*мең миллиард*)

**ТРИЛÓГИЯ** *ж* трилогия (*авторҙың бер үк идея менән һуғарылған өс әҫәре*); **трилóгия З.Бии́шевой** З.Биишеваның трилогияһы

**ТРИНÁДЦАТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* ун өсөнсө

**ТРИНÁДЦАТЬ** *числ.* ун өс; **тринáдцать человéк** ун өс кеше

**ТРИ́О** *с нескл.*; *в разн. знач.* трио; **три́о для фортепья́но** фортепьяно өсөн трио; **три́о баяни́стов** баянсылар триоһы

**ТРИÓД** *м* триод (*өс электродлы лампа*)

**ТРИОЛÉТ** *м*; *лит.* триолет (*шиғыр төрө*)

**ТРИ́ПЛЕКС** *м*; *спец.* триплекс (*ике ҡатлы быяла*)

**ТРИ́ППЕР** *м*; *мед.* триппер (*венерик ауырыу*)

**ТРИПСИ́Н** *м*; *физиол.* трипсин (*ашҡаҙан аҫты биҙе бүлеп сығарған һуттың мөһим ферменты*)

**ТРИ́ПТИХ** *м* триптих (**1.** *сәнғ. идеяһы яғынан берләштерелгән өс һүрәт һ.б.* **2.** *әҙ. дөйөм фекер менән берләштерелгән өс шиғырҙан һ.б. торған әҫәр* **3.** *өскә бөкләп һалына торған икона*)

**ТРИ́СТА** *числ.* өс йөҙ; **три́ста лет** өс йөҙ йыл

**ТРИ́СТИХ** *м*; *лит.* өс юллы строфа

**ТРИТÓН** *м* тритон, һыу кеҫәрткеһе (*ер-һыу йәнлеге*)

**ТРИУМВИРÁТ** *м* триумвират (**1.** *Боронғо Римда юғары хакимиәтте ҡулға төшөрөү өсөн өс сәйәси эшмәкәрҙең союзы* **2.** *берәй нәмә эшләү өсөн берләшкән өс кеше*)

**ТРИУ́МФ** *м* триумф, ҙур ҡаҙаныш; **триу́мф росси́йского бале́та** Рәсәй балетының триумфы

**ТРИУМФА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** триумф ...ы, триумфаль; **Триумфа́льная а́рка** Триумфаль арка **2.** (*торжественный, победный*) тантана ...ы, триумф ...ы

**ТРИУМФА́ТОР** *м* триумфатор (**1.** *Боронғо Римда һуғышта еңеп ҡайтҡан, тантаналы ҡаршы алынған полководец* **2.** *ҙур еңеүҙәргә, уңыштарға ирешеүсе кеше*)

**ТРИХИ́НА** *ж* трихина (*паразит селәүсен*)

**ТРО́ГАТЕЛЬНОСТЬ** *ж* тәьҫирлелек, күңел нескәлеге

**ТРО́ГАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тәьҫирләндерә торған, тулҡынландырғыс, тәьҫирле; **тро́гательная забо́та** тулҡынландырғыс ҡайғыртыу

**ТРО́ГАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* тейеү, ҡағылыу, ороноу, сиртеү; **па́льцем не тро́гать** тырнаҡ менән дә сиртмәү **2.** *перен.* (*волновать*) тәьҫир итеү, күңел нескәртеү, тулҡынландырыу; **тро́гать расска́зом** һөйләп тулҡынландырыу **3.** *кого-что*; *разг.* (*беспокоить*) борсоу, ҡағылыу; **не тро́гайте его́** уны борсомағыҙ **4.** *без доп.*; *разг.* (*начинать движение*) ҡуҙғалып китеү, юлға сығыу **5.** *повел.* **тро́гай** ҡуҙғал; **всё гото́во, тро́гай** барыһы ла әҙер, ҡуҙғал **6.** *что*; *разг.* (*брать, пользоваться*) ҡағылыу, тейеү, рөхсәтһеҙ тотоноу; **нельзя́ тро́гать чужо́е** кешенекенә тейергә ярамай **7.** *что* күренә башлау, беленеү; **седина́ уже́ тро́гает виски́** сикәләрҙә сал сәстәр ҙә күренә башлаған

**ТРО́ГАТЬСЯ** *несов.* **1.** (*двигаться с места*) юлға сығыу, ҡуҙғалыу; **лёд тро́нулся** боҙ ҡуҙғалды **2.** *перен.* (*умиляться*) күңел йомшарыу, тулҡынланыу, йәлләү; **тро́гаться до слёз** күҙҙән йәш килгәнсе тулҡынланыу **3.** *страд.* *от* **тро́гать** 1

**ТРОГЛОДИ́Т** *м* троглодит (**1.** *тәүтормошта мәмерйәлә йәшәгән кеше* **2.** *һөйл. мәҙәни яҡтан зәғиф, вәхши кеше*)

**ТРО́Е** *числ. собир.* өсәү, өс; **их бы́ло тро́е** улар өсәү ине; **тро́е су́ток** өс тәүлек

**ТРОЕ...** *урыҫ теленд*ә *ҡушма һүҙҙәрҙең "өс", "өс тапҡыр" мәғәнәһен аңлатҡан тәүге өлөшө, мәҫ.*, **троебо́рье** өс төрҙән ярыш

**ТРОЕБО́РЬЕ** *с*; *спорт.* өс төрҙән ярыш, өс төр бәйге

**ТРОЕЖЕ́НЕЦ** *м* өс ҡатынлы кеше (*бер юлы*)

**ТРОЕЖЁНСТВО** *с* өс ҡатынлы булыу, өс ҡатын менән тороу (*бер юлы*)

**ТРОЕКРА́ТНО** *нареч.* өсләтә; **троекра́тно уме́ньшить** өсләтә кәметеү

**ТРОЕКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое өс мәртәбә (тапҡыр, ҡат); **троекра́тный чемпио́н** өс тапҡыр чемпион

**ТРО́ЕЧНИК** *м* и **ТРО́ЕЧНИЦА** *ж*; *разг.* өскә уҡыусы

**ТРОИ́ТЬ** *несов. что* **1.** өс ҡатлау; **трои́ть ни́тку** епте өс ҡатлау **2.** өс мәртәбә эшләү (һөрөү һ.б.); **трои́ть па́шню** ерҙе өс мәртәбә һөрөү **3.** *спец.* өскә бүлеү, ярыу; **трои́ть бревно́** бүрәнәне ярыу ♦ **в глаза́х трои́т** күҙгә өс булып күренеү

**ТРО́ЙКА** *ж* **1.** (*цифра*) өс; **написа́ть тро́йку** өстө яҙыу **2.** (*школьная отметка*) өс, өслө; **получи́ть тро́йку** өс алыу; **учи́ться на тро́йки** өскә уҡыу **3.** *в разн. знач.* тройка; **ката́ться на тро́йке** тройкала йөрөү; **наряди́ться в но́вую тро́йку** яңы тройка кейеү **4.** *карт.* өслө **5.** өсөнсө (*троллейбус, автобус һ.б.*) **6.** (*группа из трёх человек, предметов*) өс, өсәү

**ТРОЙНИ́К** *м* өслө, өсәрләнгән, өс яҡлы; **крючо́к-тройни́к** өс яҡлы ҡармаҡ

**ТРОЙНИ́ЧНЫЙ: тройни́чный нерв** *анат.* өс сатлы нервы (*баш мейеһе нервыһының бишенсе пары*)

**ТРОЙНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*состоящий из трёх частей*) өслө; **тройна́я ла́мпа** өслө шәм; **тройны́е ра́мы** өс ҡат ҡыҫан **2.** (*устроенный*) өс ҡатлы, өс тапҡыр артыҡ, өсләтә; **в тройно́м разме́ре** өсләтә **3.** (*троякий*) өс төрлө, өс мәғәнәле, өс яҡлы ♦ **тройно́е пра́вило** *мат.* өслө ҡағиҙә

**ТРО́ЙНЯ** *ж* өс игеҙ бала; **роди́ть тро́йню** өс игеҙ бала табыу

**ТРОЙНЯ́ШКА** *ж*; *разг.* (*близнец*) өс игеҙ баланың береһе

**ТРО́ЙСТВЕННОСТЬ** *ж* өслөлөк, өс элементтан тороу

**ТРО́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *книжн.* (*тройной, троякий*) өстән төҙөлгән, өс өлөштән торған **2.** (*заключённый тремя сторонами*) өс дәүләт ...ы, өслөклө; **тро́йственный сою́з** өс дәүләт берләшмәһе

**ТРОК** *м*; *спец.* айыл

**ТРОЛЛЕ́ЙБУС** *м* троллейбус; **сесть в тролле́йбус** троллейбусҡа ултырыу

**ТРОЛЛЕ́ЙБУСНЫЙ,** -ая, -ое троллейбус(тар) ...ы; **тролле́йбусный парк** троллейбустар паркы

**ТРОМБ** *м*; *мед.* тромб, ойош ҡан (*ҡан тамырында барлыҡҡа килгән төйөр*)

**ТРОМБО́З** *м*; *мед.* тромбоз, ҡан ойошоу

**ТРОМБО́Н** *м*; *муз.* тромбон (*тынлы музыка ҡоралы*)

**ТРОМБОНИ́СТ** *м* тромбонсы, тромбонда уйнаусы

**ТРОМБОФЛЕБИ́Т** *м*; *мед.* тромбофлебит (*вена ҡан тамырҙарының шешеүе һәм тромб барлыҡҡа килеү*)

**ТРОН** *м* тәхет; **золото́й трон** алтын тәхет

**ТРО́ННЫЙ,** -ая, -ое тәхет ...ы; **тро́нный зал** тәхет залы

**ТРО́НУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* *от* **тро́нуть 2.** *прил.*; *прост.* (*слегка испорченный*) боҙола башлаған (*аҙыҡ-түлеккә ҡарата*) **3.** *разг.* (*имеющий странности*) аҡылы инәле-сығалы

**ТРО́НУТЬ** *сов.* **1.** *см.* **тро́гать 2.** *кого-что* (*погубить*) һәләк итеү, тейеү; **наш дом пожа́ром не тро́нуло** *безл.* янғын беҙҙең өйөбөҙгә теймәне **3.** *что*; *разг.* (*повредить*) тейеү, зарарлау; **де-**

**ре́вья тро́нуло моро́зом** *безл.* ағастарға һалҡын тейгән **4.** *без. доп.*; *разг.* (*отправиться куда-л.*) китеү, ҡуҙғалыу ♦ **не тро́нуть волоска́** бер бөртөк сәсе лә ҡойолмаһын; **па́льцем не тро́нуть** тырнаҡ менән дә сиртмәү

**ТРО́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** *см.* **тро́гаться**; **по́езд тро́нулся** поезд ҡуҙғалды **2.** *разг.* етеңкерәмәү, ысҡыныу (*иç-аҡыл теүәл булмау*)

**ТРОП** *м*; *лит.* троп (*күсмә мәғәнәлә ҡулланылған һүҙ йәки һүҙбәйләнеш*)

**ТРОПА́** *ж* һуҡмаҡ, юл, тар юл, берләм юл; **го́рная тропа́** тау юлы

**ТРО́ПИК** *м* **1.** тропик (*экваторҙан төньяҡҡа йәки көньяҡҡа 23°–27° алыçлыҡта торған параллель һыҙыҡ*); **тро́пик Ра́ка** Ҡыçала тропигы (*экваторҙан төньяҡта*) **2.** *мн.* **тро́пики**; *геогр.* тропиктар (*Ер шарының иң эçе бүлкәте*)

**ТРОПИ́НКА** *ж* һуҡмаҡ, берләм юл; **проложи́ть тропи́нку** һуҡмаҡ һалыу

**ТРОПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *геогр.* тропик; **тропи́ческий по́яс** тропик бүлкәт; **тропи́ческая маляри́я** тропик биҙгәк

**ТРО́ПКА** *ж*; *разг. см.* **тропи́нка**

**ТРОПОСФЕ́РА** *ж* тропосфера (*һауаның Ерҙән стратосфераға тиклем булған түбәнге араһы*)

**ТРОС** *м* арҡан, трос; **бро́сить трос** трос ташлау

**ТРОСТИ́НКА** *ж* ҡамыш һабағы

**ТРОСТНИ́К** *м* ҡамыш ♦ **са́харный тростни́к** шәкәр ҡамышы

**ТРОСТНИКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡамыш ...ы; **тростнико́вые за́росли** ҡамыш ҡыуаҡлығы **2.** (*сделанный из тростника*) ҡамыш; **тростнико́вая кры́ша** ҡамыш ҡыйыҡ

**ТРОСТЬ** *ж* таяҡ, ҡул таяғы

**ТРОСТЯ́НКА** *ж* һаҙ ҡыяғы, ағайрыҡ

**ТРОТИ́Л** *м* тротил (*шартлатҡыс матдә*)

**ТРОТУА́Р** *м* тротуар; **идти́ по тротуа́ру** тротуарҙан барыу

**ТРОФЕ́Й** *м* трофей, улъя, ғәнимәт; **взять трофе́й** трофей алыу

**ТРОФЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое улъя, улъя ...ы, ғәнимәт, ғәнимәт ...ы; **трофе́йное иму́щество** ғәнимәт мөлкәте; **трофе́йное ору́жие** улъя ҡоралы

**ТРОЮ́РОДНЫЙ,** -ая, -ое өс туған; **троюро́дный брат** өс туған ағай; **троюро́дная сестра́** өс туған апай

**ТРОЯ́КИЙ,** -ая, -ое өс төрлө, өс мәғәнәле, өс яҡлы; **тро́який смысл** өс төрлө мәғәнә

**ТРУБА́** *ж* **1.** (*печная*) мөрйә; (*самоварная, печная, водопроводная*) торба; **из трубы́ идёт дым** мөрйәнән төтөн сыға; **труба́ течёт** торба аға **2.** *муз.* борғо, һыбыҙғы; **игра́ть на трубе́** борғола уйнау **3.** *анат.* көпшә, торба; **евста́хиева труба́** евстахий торбаһы ♦ **вы́лететь в трубу́** *см.* **вы́лететь**; **хвост трубо́й** *в знач. сказ.*; *прост.* ҡойроғон һыртҡа һалған; **де́ло труба́** эштәр харап; **пройти́ ого́нь и во́ду (и ме́дные тру́бы)** *см.* **ого́нь**

**ТРУБАДУ́Р** *м* йырсы-шағир, трубадур (*Урта быуаттағы*)

**ТРУБА́Ч** *м* борғосо, һорнайсы

**ТРУБИ́ТЬ** *несов.* **1.** *во что* ҡысҡыртыу, борғо ҡысҡыртыу **2.** *перен.*, *разг.* (*разглашать*) шаулау, ҡысҡырып һөйләү; **об э́том де́ле все трубя́т** был турала бөтәһе шаулай **3.** (*звучать — о трубе*) ҡысҡыртыу; **тру́бы трубя́т** борғолар ҡысҡырта **4.** *что* борғола сигнал биреү; **труби́ть сбор** борғола йыйылырға сигнал биреү

**ТРУ́БКА** *ж* **1.** (*курительная*) төрөпкә; **кури́ть тру́бку** төрөпкә тартыу **2.** (*телефонная*) трубка; **взять тру́бку** трубканы алыу **3.** (бәләкәй) торба; **сверну́ть чертёж в тру́бку** һыҙымды торба итеп төрөү **4.** *спец.* (бәләкәй) көпшә; **электроннолучева́я тру́бка** электрон нурлы көпшә; **рези́новая тру́бка** резина көпшә

**ТРУБКОВЁРТЫ** *мн.* (*ед.* **трубковёрт** *м*); *зоол.* япраҡ бөгәр ҡуңыҙҙар ғаиләһе

**ТРУ́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мөрйә ...ы, торба ...ы; **тру́бный заво́д** торба заводы; **тру́бный дым** мөрйә төтөнө **2.** борғо ...ы; **тру́бный звук** борғо тауышы

**ТРУБО...** *урыç телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "торба" мәғәнәһендә ҡулланылған тәүге өлөшө, мәç.,* **трубоintroduce**

**ТРУБОЛИТЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое торба ҡойоу ...ы; **труболите́йный заво́д** торба ҡойоу заводы

**ТРУБОПРОВО́Д** *м* үткәргес торба; **прокла́дка трубопрово́да** үткәргес торба һалыу

**ТРУБОПРОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое үткәргес торба һалыу ...ы; **трубопрово́дные рабо́ты** үткәргес торба һалыу эштәре

**ТРУБОПРОВО́ДЧИК** *м* үткәргес торба һалыусы

**ТРУБОПРОКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое торба яһау ...ы, торба прокатлау ...ы, торбалар яһай торған; **трубопрока́тный заво́д** торба прокатлау заводы

**ТРУБОПРОКА́ТЧИК** *м* торба прокатлаусы, трубопрокатсы

**ТРУБОУКЛА́ДЧИК** *м* **1.** торбалар һалыусы (*эшсе*) **2.** торба һалыу машинаһы

**ТРУБОЧИ́СТ** *м* мөрйә таҙартыусы

**ТРУ́БОЧНЫЙ,** -ая, -ое төрөпкә ...ы; **тру́бочный таба́к** төрөпкә тәмәкеһе

**ТРУ́БЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*в виде трубки*) көпшә һымаҡ (булған) **2.** *тех.* торбанан торған; **тру́бчатая батаре́я** торбанан торған батарея

**ТРУД** *м* **1.** хеҙмәт, эш; **у́мственный труд** аҡыл хеҙмәте; **тяжёлый труд** ауыр эш; **пла́та за труд** эш өсөн түләү; **ору́дие труда́** хеҙмәт ҡоралы **2.** *мн.* **труды́** (*хлопоты*) көс, мәшәҡәт, хәстәр **3.** (*произведение, результат труда*) әçәр, хеҙмәт; **печа́тный труд** баçма хеҙмәт **4.** (*усилие, направленное на достижение чего-л.*) көс; **напра́сный труд** бушҡа түгелгән көс ♦ **без труда́** еңел генә, көс һалмай; **взять на себя́ труд** *с неопр.* үҙ хәстәреңә алыу; **с трудо́м** көс-хәл менән

**ТРУДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*работать*) хеҙмәт итеү, эшләү; **труди́ться на бла́го Ро́дины** Тыуған ил мәнфәғәтенә хеҙмәт итеү **2.** *над чем* эшләү, көс һалыу, аҙапланыу; **труди́ться над зада́чей** мәсьәлә өҫтөндә эшләү **3.** *с неопр.* и *без доп.* (*прилагать усилия*) тырышыу, мәшәкәтләнеү; **труди́ться поня́ть** аңларға тырышыу

**ТРУ́ДНО 1.** *нареч.* ауырлыҡ менән, ҡыйынлыҡ менән; **теле́га дви́галась тру́дно** арба ауырлыҡ менән бара **2.** *в знач. сказ.*; *в разн. знач.* ауыр, ҡыйын; **тебе́ тру́дно** *безл.* һиңә ҡыйын; **тру́дно дыша́ть** ауыр тын алыу; **тру́дно жить** ҡыйын йәшәү

**ТРУДНО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ауыр", "ҡыйын" мәғәнәһендә ҡулланылған тәүге өлөшө, мәҫ.*, **труднопонима́емый** ауыр аңлайышлы

**ТРУДНОВОСПИТУ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое тәрбиәгә (тәрбиәләүгә) ауыр (*кеше тураһында*)

**ТРУДНОДОСТУ́ПНЫЙ,** -ая, -ое юлһыҙ, барырға (менергә, инергә) юлы ҡыйын (булған); **труднодосту́пный райо́н** барырға юлы ҡыйын булған район

**ТРУДНОИЗЛЕЧИ́МЫЙ,** -ая, -ое дауалауы ауыр (булған)

**ТРУДНОПРОХОДИ́МЫЙ,** -ая, -ое үтергә ҡыйын; **труднопроходи́мая ме́стность** үтергә ҡыйын урын

**ТРУ́ДНОСТЬ** *ж* **1.** ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ; **тру́дность пути́** юлдың ауырлығы **2.** *обычно мн.* **тру́дности** ҡыйынлыҡтар, ауырлыҡтар; **больши́е тру́дности** ҙур ауырлыҡтар; **преодоле́ть тру́дности** ҡыйынлыҡтарҙы еңеү

**ТРУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ауыр, ҡыйын; **тру́дная рабо́та** ауыр эш; **каза́ться тру́дным** ауыр тойолоу; **тру́дный год** ҡыйын йыл **2.** (*мучительный*) ауыр, ыҙалы, ғазаплы, яфалы, ҡыйын; **тру́дная смерть** ғазаплы үлем **3.** мәшәкәтле, ҡыйынлыҡ килтергән, ҡатмарлы, ауыр; **тру́дный ребёнок** мәшәкәтле бала; **тру́дный челове́к** ауыр кеше **4.** (*о болезни*) ҡурҡыныс, ауыр **5.** (*о больном*) хәле ауыр (хөрт, мөшкөл)

**ТРУДО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "хеҙмәт", "эш" мәғәнәһендә ҡулланылған тәүге өлөшө, мәҫ.*, **трудоде́нь** хеҙмәт көнө

**ТРУДОВО́Й,** -ая, -ое **1.** хеҙмәт ...ы, эш ...ы; **трудова́я дисципли́на** хеҙмәт тәртибе; **трудовы́е спо́ры** *юр.* хеҙмәт дәғүәләре **2.** (*живущий своим трудом*) хеҙмәтсән, хеҙмәт ...ы, эшсән, эшләп көн күреүсе; **трудово́й челове́к** эшләп көн күреүсе кеше; **трудово́й наро́д** хеҙмәтсән халыҡ **3.** (*приобретённый трудом*) эшләп тапҡан; **трудовы́е де́ньги** эшләп тапҡан аҡса ♦ **трудова́я кни́жка** хеҙмәт кенәгәһе

**ТРУДОДЕ́НЬ** *ж* эш (хеҙмәт) көнө

**ТРУДОЁМКИЙ,** -ая, -ое күп хеҙмәт (көс, тырышлыҡ) талап иткән; **трудоёмкая рабо́та** күп хеҙмәт талап иткән эш

**ТРУДОЁМКОСТЬ** *ж* күп көс (хеҙмәт, тырышлыҡ) талап итеү

**ТРУДОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое эш һөйөүсән, егәрле, эшһөйәр; **трудолюби́вый челове́к** эш һөйөүсән кеше

**ТРУДОЛЮ́БИЕ** *с* эш һөйөүсәнлек, егәр, егәрлелек; **показа́ть трудолю́бие** егәрлелек күрһәтеү

**ТРУДОСПОСО́БНОСТЬ** *ж* эшкә (хеҙмәткә) булдыҡлылыҡ (һәләтлелек, яраҡлылыҡ); **утра́та трудоспосо́бности** эшкә яраҡлылыҡты юғалтыу

**ТРУДОСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое эшкә булдыҡлы (яраҡлы, һәләтле); **трудоспосо́бное населе́ние** эшкә яраҡлы халыҡ

**ТРУДОУСТРО́ЙСТВО** *с* эшкә урынлашыу (инеү), эшкә урынлаштырыу; **трудоустро́йство молодёжи** йәштәрҙең эшкә урынлашыуы

**ТРУДЯ́ЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся **1.** *прич. от* **труди́ться 2.** *прил.* хеҙмәт ...ы, хеҙмәт итеүсе, эшләүсе; **трудя́щиеся ма́ссы** хеҙмәт эйәләре **3.** *в знач. сущ.* **трудя́щийся** *м* хеҙмәтсән; **трудя́щиеся го́рода и дере́вни** ҡала һәм ауыл хеҙмәтсәндәре

**ТРУ́ЖЕНИК** *м* и **ТРУ́ЖЕНИЦА** *ж* эш (хеҙмәт) кешеһе, эшсән, хеҙмәтсән; **тру́женики поле́й** баҫыу эшсәндәре

**ТРУНИ́ТЬ** *несов. над кем-чем* и *без доп.* шаяртыу, мәрәкәләү

**ТРУП** *м* үлек, мәйет; **крема́ция тру́па** мәйетте яндырыу ♦ **живо́й труп** тере мәйет; **переступи́ть (перешагну́ть) че́рез труп** кеше башы аша йөрөү (*берәй маҡсатҡа ирешеү өсөн*); **то́лько че́рез мой труп** үлһәм дә ризалығым юҡ

**ТРУ́ПНЫЙ,** -ая, -ое үлек ...ы, мәйет ...ы; **тру́пный за́пах** үлек еҫе

**ТРУ́ППА** *ж* труппа (*артистар коллективы*); **бале́тная тру́ппа** балет труппаһы

**ТРУС** *м* и **ТРУСИ́ХА** *ж* ҡурҡаҡ, йөрәкһеҙ, ҡуян йөрәк ♦ **тру́су (тру́са) пра́здновать** шөрләү, ҡурҡыу

**ТРУ́СИТЬ** *несов.* ҡурҡыу, шыртлау, шөрләү; **пе́ред ним на́чал тру́сить** уның алдында шөрләй башланы; **тру́сить остава́ться одно́й в темноте́** ҡараңғыла яңғыҙ ҡалырға ҡурҡыу

**ТРУСИ́ТЬ I** *несов.*; *прост. что* (*сыпать*) һелкеү, ҡағыу (*мәҫ., тоҡтан ондо*)

**ТРУСИ́ТЬ II** *несов.*; *разг.* (*бежать мелкой рысью — о лошади*) юрғалау, өлкөлдәү; (*ехать мелкой рысью — о человеке*) юрғалап (йыбырлап) атлау

**ТРУСЛИ́ВОСТЬ** *ж* ҡурҡыусанлыҡ, ҡурҡаҡлыҡ

**ТРУСЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡурҡаҡ, ҡурҡыусан; (*о лошади*) өркәк

**ТРУ́СОСТЬ** *ж* ҡурҡаҡлыҡ, өркәклек

**ТРУСЦА́** *ж*; *разг.* (*неторопливый бег*) өлкөлдәп барыу, юрғалау, яй ғына юртыу

**ТРУСЦО́Й** *нареч.*; *разг.* **1.** юрғалау; **е́хать трусцо́й** юрғалап барыу **2.** (*быстрым, мелким шагом*) ваҡ-ваҡ баҫып атлау

**ТРУСЫ́** *мн.* трусик; **спорти́вные трусы́** спорт трусигы

**ТРУТ** *м* (*материал для высекания огня*) саҡма мамығы, ҡау (*саҡма таш менән ут тоҡандыра торған мамыҡ, кипкән бәшмәк һ.б.*)

**ТРУ́ТЕНЬ** *м* **1.** *пчел.* һоро ҡорт, әре, әре ҡорт (*ата бал ҡорто*) **2.** *перен., разг.* һоро ҡорт, әрәмтамаҡ

**ТРУТОВИ́К** *м* ҡыу бәшмәк, ағас бәшмәге

**ТРУТО́ВКА** *ж*; *пчел.* эшсе ҡорт (*йомортҡа һалыусы ҡорт*)

**ТРУХА́** *ж* **1.** серек, ҡау, онтаҡ (*бесән, һалам тураһында*); **преврати́ться в труху́** онтаҡҡа әйләнеү **2.** *перен., разг.* сүп-сар, сүп, ваҡ-төйәк

**ТРУХЛЯ́ВЕТЬ** *несов.* сереү; **ста́рый пень трухля́веет** иҫке төпһә серей

**ТРУХЛЯ́ВЫЙ,** -ая, -ое серек, серегән; **трухля́вый пень** серек төпһә

**ТРУЩО́БА** *ж* **1.** (*труднопроходимое место*) шырлыҡ **2.** (*глушь, захолустье*) ҡараңғы мөйөш, төпкөл **3.** (*бедная, грязная часть города*) емерек (ярлы) өй(ҙәр)

**ТРЫН-ТРАВА́** *ж в знач. сказ.*; *разг.* сүп тә түгел, бер ни түгел; **им всё э́то трын-трава́** улар өсөн был сүп тә түгел

**ТРЮИ́ЗМ** *м*; *книжн.* (*избитая истина*) трюизм

**ТРЮК** *м* трюк (**1.** *оҫта алым* **2.** *күсм. оҫта эшләнгән, хәйләле, мәкерле эш*)

**ТРЮКА́Ч** *м*; *разг.* трюктар яһаусы (**1.** *артист-акробат* **2.** *күсм. мәкерле эштәр ҡылыусы кеше*)

**ТРЮКА́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое трюктар яһау; **трюка́ческие приёмы** трюктар яһау алымы

**ТРЮКА́ЧЕСТВО** *с* трюктар яһарға әүәҫлек

**ТРЮМ** *м* трюм (**1.** *диңг. караптың түбәнге палубаһы менән төбө араһындағы урын* **2.** *театр. сәхнә аҫтындағы урын*)

**ТРЮ́МНЫЙ,** -ая, -ое трюм ...ы; **трю́мное отделе́ние** трюм бүлеге

**ТРЮМО́** *с нескл.* трюмо (*ҙур көҙгө, стена көҙгөһө*)

**ТРЮ́ФЕЛЬ** *м* трюфель (**1.** *бәшмәк* **2.** *шоколадлы кәнфит*)

**ТРЮ́ФЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** трюфель ...ы, трюфелдән әҙерләнгән; **трю́фельная припра́ва** трюфелдән әҙерләнгән аш тәмләткес **2.** трюфель, трюфель ...ы; **трю́фельные конфе́ты** трюфель кәнфит

**ТРЯПИ́ЦА** *ж*; *разг. см.* **тря́пка** 1

**ТРЯПИ́ЧНИК** *м* сепрәк-сапраҡ йыйыусы

**ТРЯПИ́ЧНИЦА** *ж* **1.** *см.* **тряпи́чник** **2.** *разг.* сепрәк ҡоло (*кейем-һалым менән мауыҡҡан ҡатын-ҡыҙ*)

**ТРЯПИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сепрәк ...ы; **тряпи́чный лоску́т** сепрәк киҫәге **2.** сепрәк, сепрәктән яһалған; **тряпи́чные половики́** сепрәк балаҫ

**ТРЯ́ПКА** *ж* **1.** сепрәк, сепрәк киҫәге; **бе́лая тря́пка** аҡ сепрәк **2.** *мн.* **тря́пки**; *разг.* (*женские наряды*) кейем-һалым **3.** *разг., пренебр.* (*безвольный человек*) йомшаҡ, ебегән, мәмәй (*кеше*)

**ТРЯ́ПОЧНЫЙ,** -ая, -ое сепрәктән яһалған, сепрәк; **тря́почная ку́кла** сепрәк ҡурсаҡ

**ТРЯПЬЁ** *с собир.*; *разг.* алам-һалам, сепрәк-сапраҡ; **собира́ть тряпьё** алам-һалам йыйыу

**ТРЯСИ́ЛЬНЫЙ** *ж*; *спец.* ҡаҡҡыс, таҙартҡыс (*етен сүсен таҙарта торған машина*)

**ТРЯСИ́НА** *ж* **1.** күтер, батҡаҡлыҡ **2.** *чего, какая*; *перен.* батҡаҡлыҡ, һаҙлыҡ; **тряси́на обыва́тельщины** обывателлек һаҙлығы

**ТРЯСИ́ННЫЙ,** -ая, -ое күтерле, һиңкелдәк; **трясинное боло́то** һиңкелдәк һаҙлыҡ

**ТРЯ́СКА** *ж см.* **трясти́** 1, 3, 4, **трясти́сь** 1, 2 ♦ **зада́ть тря́ску** әрләү, туҡмау

**ТРЯ́СКИЙ,** -ая, -ое **1.** һиңкелдәк, һелкетә торған; **тря́ская теле́га** һиңкелдәк арба **2.** (*вызывающий тряску, с тряской*) һикәлтәле, һелкетә торған, соҡор-саҡырлы; **тря́ская доро́га** һикәлтәле юл

**ТРЯСОГУ́ЗКА** *ж* сәпсек; **бе́лая трясогу́зка** аҡ сәпсек; **го́рная трясогу́зка** тау сәпсеге

**ТРЯСТИ́** *несов.* **1.** *кого-что* (*колебать*) һелкеү, һелкетеү; **трясти́ ру́ку** ҡулын һелкетеү **2.** *кого-что* ҡалтыратыу, дерелдәтеү; **его́ трясёт лихора́дка** уны биҙгәк ҡалтырата **3.** (*вытряхивать*) ҡағыу; **трясти́ мешо́к** тоҡто ҡағыу **4.** *кого-что* (*раскачивая, вызывать падение плодов*) һелкетеү, һелкендереү; **трясти́ де́рево** ағасты һелкетеү **5.** *чем* (*качать*) сайҡау, һелкетеү; **ло́шадь трясёт гри́вой** ат ялын һелкетә

**ТРЯСТИ́СЬ** *несов.* **1.** (*качаться, дрожать*) ҡалтырау, һелкенеү; **трясти́сь от стра́ха** ҡурҡыуҙан ҡалтырау **2.** *разг.* (*ехать раскачиваясь, подпрыгивая на тряской дороге*) һелкенеп барыу; **трясти́сь на маши́не** машинала һелкенеп барыу **3.** *над кем-чем*; *перен., разг.* ҡурҡып (ҡалтырап) тороу; **трясти́сь над ребёнком** бала өсөн ҡурҡып тороу **4.** (*бояться*) ҡурҡыу, ҡалтырау, ҡурҡып (ҡалтырап) тороу; **трясти́сь пе́ред нача́льством** түрәләр алдында ҡалтырап тороу ♦ **поджи́лки трясу́тся** теҙ быуындары ҡалтырай

**ТРЯСУ́НКА** *ж* ҡылбырбаш (*ҡыяҡ үлән*)

**ТРЯХНУ́ТЬ** *сов. см.* **трясти** 1, 4, 5; **тряхну́ть за плечо́** яурындан һелкетеү; **теле́га тряхну́ла** арба һиңкетте; **тряхну́ть голово́й** баш сайҡау ♦ **тряхну́ть larино́й** үткәнде иҫкә төшөрөп алыу

**ТСС** *межд.* тсс, сеү, шшш («*шауламағыҙ*» *мәғәнәһендә*)

**ТУАЛЕ́Т** *м* **1.** (*наряд, одежда*) туалет, кейем-һалым (*күберәк ҡатын-ҡыҙҙыҡы*) **2.** *в разн. знач.* туалет; **у́тренний туале́т** иртәнге туалет; **причёсываться пе́ред туале́том** туалет алдында тараныу **3.** (*уборная*) бәҙрәф, туалет, әбрәкәй

**ТУАЛЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое туалет ...ы, бәҙрәф ...ы; **туале́тный сто́лик** туалет өҫтәле; **туале́тное мы́ло** еҫле һабын; **туале́тная бума́га** бәҙрәф ҡағыҙы

**ТУБЕРКУЛЁЗ** *м* туберкулёз; (*шейных желёз*) силсә; **ко́стный туберкулёз** һөйәк туберкулёзы

**ТУБЕРКУЛЁЗНИК** *м*; *разг.* **1.** (*врач*) туберкулёздан дауалай торған табип **2.** (*больной*) туберкулёзлы кеше, туберкулёз менән ауырыусы

**ТУБЕРКУЛЁЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** туберкулёз ...ы; **туберкулёзный санато́рий** туберкулёз шифаханаһы **2.** *в знач. сущ.* **туберкулёзный** *м* и **туберкулёзная** *ж* туберкулёзлы кеше, туберкулёз менән ауырыусы

**ТУБЕРКУЛИ́Н** *м* туберкулин (*туберкулёз таяҡсаларынан алынған матдә, ауырыуҙы билдәләү өсөн файҙаланыла*)

**ТУБЕРО́ЗА** *ж* тубероза, тәбәр (*декоратив гөл*)

**ТУВИ́НСКИЙ,** -ая, -ое тува ...ы, Тува ...ы; **туви́нский язы́к** тува теле

**ТУВИ́НЦЫ** *мн.* тува халҡы, тувалар // *ед.* **туви́нец** *м* тува ир-аты; **туви́нка** *ж* тува ҡатын-ҡыҙы

**ТУ́ГО 1.** *нареч.* тығыҙлап, тыҡыслап, ныҡ ҡыҫып; **ту́го завяза́ть** ҡыҫып бәйләү; **ту́го наби́ть мешо́к** тоҡто тыҡыслап тултырыу **2.** *нареч.* (*с трудом*) ауыр, ауырлыҡ (ҡыйынлыҡ) менән; **де́ло продвига́ется ту́го** эш ауыр бара **3.** *в знач. сказ.*, *безл.*; *разг.* ауыр; **нам пришло́сь ту́го** беҙгә ауырға тура килде

**ТУГО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡаты", "тулы", "ауыр" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **тугощёкий** тулы яңаҡлы

**ТУГОДУ́М** *м*; *разг.* оҙаҡ уйлаусы кеше

**ТУГО́Й,** -ая, -ое **1.** (*сильно натянутый*) ныҡ тартылған, ҡаты; **туго́й лук** ныҡ тартылған ян **2.** ҡаты; **туга́я пружи́на** ҡаты пружина **3.** (*плотно набитый*) тығыҙлап (тыҡыслап) тултырылған, тығыҙ, тулы; **туго́й мешо́к** тыҡыслап тултырылған тоҡ **4.** ҡыҫыҡ; **туго́й воротничо́к** ҡыҫыҡ яға ♦ **туго́й карма́н** кеҫәһе ҡалын; **туго́й на́ ухо** ҡолаҡҡа ҡаты

**ТУГОПЛА́ВКИЙ,** -ая, -ое ауыр иреүсән (*металл, быяла*); **тугопла́вкий мета́лл** ауыр иреүсән металл

**ТУГОУ́ХИЙ,** -ая, -ое ҡолаҡҡа ҡаты, һаңғырауыраҡ

**ТУГОУ́ХОСТЬ** *ж* ҡолаҡҡа ҡатылыҡ (ҡаты булыу)

**ТУ́ГРИК** *м* тугрик (*Монголия аҡса берәмеге*)

**ТУДА́** *нареч.* шунда, шул яҡҡа; **я иду́ туда́** мин шунда барам ♦ **ни туда́ ни сюда́** ни тегеләй ни былай; тегеләй ҙә былай ҙа түгел; **туда́ и доро́га** *разг.* ана бара юлы, юлы шул

**ТУДА́-СЮДА́** *нареч.*; *разг.* **1.** улай-былай, унда-бында, үрле-түрле; **ходи́ть туда́-сюда́** үрле-түрле йөрөү **2.** *в знач. сказ.* (*сносно*) бер сама, арыу, ярайһы, ярарлыҡ; **э́то ещё туда́-сюда́** был әле ярарлыҡ

**ТУ́ЕВЫЙ,** -ая, -ое сауыр ...ы; **ту́евые ши́шки** сауыр тубырсыҡтары

**ТУЖИ́ТЬ** *несов.*; *трад.-поэт.* ҡайғырыу, көйөнөү, хәсрәтләнеү

**ТУ́ЖИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* көсәнеү, серәшеү, серәнеү

**ТУЖУ́РКА** *ж* тужурка (*өҫкө кейем*)

**ТУЗ I** *м* **1.** *карт.* туз (*уйын кәртенең иң ҙуры*) **2.** *чего, какой*; *перен.*, *разг.* ҙур кеше, дәрәжәле кеше, туз

**ТУЗ II** *м* туз (*бер кешелек ике ишкәкле шлюпка*)

**ТУЗЕ́МЕЦ** *м* и **ТУЗЕ́МКА** *ж* ерле кеше

**ТУЗЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* ерле; **тузе́мное населе́ние** ерле халыҡ

**ТУЗИ́ТЬ** *несов. кого*; *разг.* туҡмау, дөмбәҫләү

**ТУЗЛУ́К** *м*; *спец.* тоҙлама, тоҙло һыу (*балыҡ һ.б. тоҙлау өсөн*)

**ТУК I** *м*; *с.-х.* тук (*минераль ашлама, серетмә*)

**ТУК II** *межд.* туҡ-туҡ (*шаҡыған һ.б. тауыштарҙы белдереүсе ымлыҡ*)

**ТУ́КАТЬ** *несов.*; *разг.* шаҡылдатыу, дөбөрләтеү, туҡылдатыу

**ТУ́КАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* бәрелеү, һуғылыу

**ТУ́КНУТЬСЯ** *сов. см.* **ту́каться**

**ТУ́КОВЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* тук ...ы, тук етештерә торған; **ту́ковый комбина́т** тук комбинаты

**ТУ́ЛОВИЩЕ** *с* (*человека*) кәүҙә; (*животных*) тороҡ

**ТУЛУМБА́С** *м* тулумбас (*һуҡма музыкаль ҡоралы*)

**ТУЛУ́П** *м* толоп

**ТУЛЬЯ́** *ж* түбә (*эшләпә, фуражка, бүрек түбәһе*); **шля́па с высо́кой тульёй** бейек түбәле эшләпә

**ТУЛЯРЕМИ́Я** *ж*; *мед.* туляремия (*сысҡандар, бөжәктәр аша таралған йоғошло ауырыу*)

**ТУМА́К I** *м*; *прост.* йоҙроҡ менән һуғыу, йоҙроҡлау

**ТУМА́К II** *м* тумаҡ (**1.** *ҡуяндарҙың бер төрө* **2.** *махс. буялған ҡуян тиреһе*)

**ТУМА́Н I** *м*; *прям.*, *перен.* томан; **густо́й тума́н** ҡуйы томан; **тума́н рассе́ялся** томан таралды ♦ **напусти́ть тума́ну** бутау, төтөн ебәреү; **тума́н в голове́** баш томаланыу; **тума́н в глаза́х** күҙе томаланған

**ТУМА́Н II** и **ТОМА́Н** *м* туман, томан (*Иран аҡсаһы*)

**ТУМА́НИТЬ** *несов. что* **1.** (*застилать*) томанлау, ҡараңғылау, ҡаплау; **мгла тума́нит горизо́нт** монар офоҡто ҡараңғылай **2.** *прям.*, *перен.* (*лишать возможности ясно видеть, соображать*) томалау, ҡаплау; **слёзы тума́нят глаза́** күҙҙәрҙе йәш ҡаплай

**ТУМА́НИТЬСЯ** *несов.* **1.** томанланыу, томан ҡаплау, ҡараңғыланыу; **река́ тума́нится** йылға-

ны томан ҡаплай **2.** *перен.* ҡараңғыланыу, ҡайғы баҫыу; **взор тума́нится** күҙ алды ҡараңғылана **3.** *страд. от* **тума́нить**

**ТУМА́ННО 1.** *нареч.* томанлы; **выража́лся тума́нно** томанлы аңлата **2.** *в знач. сказ., безл.* томан; **сего́дня на дворе́ тума́нно** бөгөн тышта томан

**ТУМА́ННОСТЬ** *ж* **1.** томанлыҡ, томанлылыҡ, томан менән ҡапланғанлыҡ **2.** *астр.* (*светящиеся или тёмные облака межзвёздного газа*) томанлыҡ **3.** *перен.* (*неясность*) аңлайышһыҙлыҡ, буталсыҡлыҡ; **тума́нность ре́чи** телмәрҙең аңлайышһыҙлығы **4.** тоноҡлоҡ; **тума́нность взгля́да** ҡараштың тоноҡлоғо

**ТУМА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** томан ...ы; **тума́нная пелена́** томан пәрҙәһе **2.** томан баҫҡан, томанлы; **тума́нное у́тро** томанлы иртә **3.** *перен.* (*неясный*) аңлайышһыҙ, буталсыҡ, томанлы; **тума́нный отве́т** буталсыҡ яуап; **тума́нная речь** буталсыҡ телмәр **4.** (*подёрнутый дымкой — о глазах, взгляде*) тоноҡ; **тума́нный взгляд** тоноҡ ҡараш

**ТУ́МБА** *ж* **1.** тәпәш бағана, бүкән **2.** (*подставка*) тумба; **ста́вить ва́зу на ту́мбу** вазаны тумбаға ҡуйыу **3.** *разг.* (*о неуклюжем человеке*) ит бүкәне

**ТУ́МБЛЕР** *м*; *тех.* тумблер

**ТУ́МБОЧКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **ту́мба** 1, 2; **2.** (*шкафчик*) тумбочка; **положи́ть в ту́мбочку** тумбочкаға һалыу

**ТУНГУ́ССКИЙ,** -ая, -ое *уст.* тунгус ...ы; **тунгу́сский язы́к** тунгус теле

**ТУНГУ́СЫ** *мн.*; *уст.* тунгустар // *ед.* **тунгу́с** *м* тунгус ир-аты; **тунгуска** *ж* тунгус ҡатын-ҡыҙы; *см.* **эве́нки**

**ТУ́НДРА** *ж*; *геогр.* тундра; **зо́на ту́ндры** тундра зонаһы

**ТУ́НДРОВЫЙ,** -ая, -ое *геогр.* тундра ...ы; **ту́ндровая полоса́** тундра һыҙаты

**ТУНЕ́Ц** *м* тунец (*эре океан балығы*)

**ТУНЕЯ́ДЕЦ** *м* и **ТУНЕЯ́ДКА** *ж* эрәмтамаҡ

**ТУНЕЯ́ДСТВО** *с* эрәмтамаҡлыҡ, эрәмтамаҡ булыу

**ТУНЕЯ́ДСТВОВАТЬ** *несов.* эрәмтамаҡ булып йәшәү, эрәмтамаҡланыу

**ТУННЕ́ЛЬ** и **ТОННЕ́ЛЬ** *м* туннель, тоннель; **железнодоро́жный тунне́ль** тимер юл туннеле; **копа́ть тунне́ль** туннель ҡаҙыу

**ТУННЕ́ЛЬНЫЙ** и **ТОННЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое туннель ...ы, тоннель ...ы

**ТУПЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*о плоских предметах*) үтмәҫләнеү, тупаҫланыу; (*о заострённых предметах*) тупаҡланыу, тупарланыу **2.** *перен.* аңраланыу, һиңмайланыу, миңрәүләнеү; **тупе́ть от го́ря** ҡайғы-хәсрәттән һиңмайланыу **3.** (*становиться менее острым — о боли*) сәңгетеп әрнетеү

**ТУПИ́К** *м* **1.** тупик, тыҡрыҡ **2.** *ж.-д.* тупик **3.** *перен.* аптыраш, аптырау ♦ **ста́вить в тупи́к** аптырашта ҡалдырыу; **стать в тупи́к** аптырап ҡалыу

**ТУПИ́ТЬ** *несов. что* (*о плоских предметах*) үтмәҫләү, тупаҫлау, тупаҫландырыу, үтмәҫләндереү; (*о заострённых предметах*) тупаҡлау, тупарлау; **тупи́ть нож** бысаҡты үтмәҫләндереү

**ТУПИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*о плоских предметах*) үтмәҫләнеү, тупаҫланыу; (*о заострённых предметах*) тупаҡланыу, тупарланыу, йөҙө ҡайтыу **2.** *страд. от* **тупи́ть**

**ТУПИ́ЦА 1.** *м* и *ж*; *разг.* аңра, маҡау (*кеше*) **2.** *ж*; *спец.* ит сапҡыс балта (*ауыр*)

**ТУПО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "тупаҡ", "үтмәҫ" мәғәнәһендәге тәүге өлөшө, мәҫ.*, **туповерши́нный** тупаҡ түбәле

**ТУПОГОЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг., пренебр.* аңра, тупаҫ, булдыҡһыҙ (*кеше*)

**ТУПО́Й,** -ая, -ое **1.** (*о плоских предметах*) тупар, йөҙө ҡайтҡан, үтмәҫ, тупаҫ; (*о заострённых предметах*) тупаҡ, тупар; **тупо́й нож** үтмәҫ бысаҡ; **тупа́я кирка́** тупар кәйлә; **тупо́й каранда́ш** тупаҡ ҡәләм **2.** (*не суживающийся к концу*) тупаҡ, киң; **ту́фли с тупы́ми носка́ми** тупаҡ башлы туфли **3.** *перен.* (*умственно ограниченный*) аңра, аҡылға самалы, иҫәр, мәғәнәһеҙ, туң; **тупо́й взгляд** мәғәнәһеҙ ҡараш; **тупо́й челове́к** аңра кеше **4.** (*безропотный*) (бер) һүҙһеҙ, ҡарыуһыҙ; **тупа́я поко́рность** һүҙһеҙ буйһоноу **5.** (*не резкий — о боли*) сәңгетеп әрнеткән; **тупа́я боль** сәңгетеп әрнеткән һыҙлау ♦ **тупо́й у́гол** *мат.* йәйенке мөйөш

**ТУПОКОНЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тупаҡ башлы, тупаҡ осло

**ТУПОЛО́БЫЙ,** -ая, -ое *разг., пренебр.* аңра, аңһыҙ

**ТУПОНО́СЫЙ,** -ая, -ое тупаҡ (киң) башлы; (*о человеке*) тупаҡ танаулы; **тупоно́сые боти́нки** тупаҡ башлы ботинка

**ТУ́ПОСТЬ** *ж* **1.** үтмәҫлек, тупаҡлыҡ; **ту́пость ножа́** бысаҡтың үтмәҫлеге **2.** *перен.* (*непонятливость*) аңралыҡ, тупаҫлыҡ, оңҡотлоҡ

**ТУПОУГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *мат.* йәйенке мөйөшлө; **тупоуго́льный треуго́льник** йәйенке мөйөшлө өсмөйөш

**ТУПОУ́МИЕ** *с* аңралыҡ, томаналыҡ

**ТУПОУ́МНЫЙ,** -ая, -ое аңра, томана (*кеше*)

**ТУР I** *м*; *в разн. знач.* тур; **пригласи́ть на тур ва́льса** вальс турына саҡырыу; **второ́й тур олимпиа́ды** олимпиаданың икенсе туры; **пе́рвый тур вы́боров** һайлауҙарҙың беренсе туры; **тур по Евро́пе** Европа буйлап тур

**ТУР II** *м* тур (**1.** *нәҫеле ҡороған ҡырағай үгеҙ* **2.** *Кавказдағы тау тәкәһе*)

**ТУР III** *м* тур (**1.** *эсенә таш һәм ҡаҫ тултырыла торған һәм гидротехникала ҡулланылған ҵрмә кәрзин* **2.** *тау башына беренсе булып күтәрелгән альпинистарҙың таштарҙан өйгән пирамидаһы*)

**ТУРА́** *ж* тура (*шахмат фигураһы, ладья*)

**ТУРБА́ЗА** *ж* (*туристическая база*) турбаза

**ТУРБИ́НА** *ж* турбина; **водяна́я турби́на** һыу турбинаһы

**ТУРБИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** турбина …ы; **турби́нный цех** турбина цехы **2.** турбина …ы, турбиналы; **турби́нный насо́с** турбиналы насос

**ТУРБИ́НЩИК** *м* турбинасы (*турбина эше белгесе*)

**ТУРБО…** *ҡушма һүҙҙәрҙең "турбина" мәғәнәһендәге тәүге өлөшө, мәҫ.,* **турбонасо́с** турбина насосы

**ТУРБОБУ́Р** *м* быраулы турбина (*бырауҙау машинаһы*)

**ТУРБОВИНТОВО́Й: турбовинтово́й самолёт** турбовинтлы самолёт

**ТУРБОВО́З** *м* турбовоз (*быу йәки газ турбинаһы ярҙамында эшләүсе локомотив*)

**ТУРБОГЕНЕРА́ТОР** *м* турбогенератор (*турбиналы агрегат*)

**ТУРБОРЕАКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое турбореактив ♦ **турбореакти́вный самолёт** турбореактив самолёт

**ТУРБОСТРОЕ́НИЕ** *с* турбина(лар) төҙөү

**ТУРБОСТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое турбиналар төҙөү …ы; **турбострои́тельная те́хника** турбиналар төҙөү техникаһы

**ТУРБУЛЕ́НТНОСТЬ** *ж*; *спец.* турбулентлыҡ (*шыйыҡлыҡ йәки газдың ағымындағы төрлөсә тулҡыныуы*)

**ТУРБУЛЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* турбулент …ы; **турбуле́нтное тече́ние** турбулент ағымы

**ТУРЕ́ЛЬ** *ж*; *воен.* турель (*туп һәм пулемёттар өсөн әйләнмәле станок*)

**ТУРЕ́ЦКИЙ,** -ая, -ое төрөк …ы, Төркиә …ы; **туре́цкий язы́к** төрөк теле; **туре́цкое прави́тельство** Төркиә хөкүмәте

**ТУРИ́ЗМ** *м* турислыҡ, туризм; **междунаро́дный тури́зм** халыҡ-ара туризм; **го́рный тури́зм** тау туризмы

**ТУ́РИЙ,** -ья, -ье тур …ы; **ту́рий рог** тур мөгөҙө

**ТУРИ́СТ** *м* и **ТУРИ́СТКА** *ж* турист; **гру́ппа тури́стов** туристар төркөмө

**ТУРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое туристик, туризм …ы; **туристи́ческая путёвка** туристик путёвка

**ТУРИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое туристик, турист …ы; **тури́стские тро́пы** турист һуҡмаҡтары; **тури́стская ба́за** туристик база

**ТУ́РКИ** *мн.* төрөктәр, төрөк халҡы // *ед.* **ту́рок** *м* төрөк ир-аты; **турча́нка** *ж* төрөк ҡатын-ҡыҙы

**ТУРКМЕ́НСКИЙ,** -ая, -ое төрөкмән; **туркме́нский язы́к** төрөкмән теле

**ТУРКМЕ́НЫ** *мн.* төрөкмәндәр, төрөкмән халҡы // *ед.* **туркме́н** *м* төрөкмән ир-аты; **туркме́нка** *ж* төрөкмән ҡатын-ҡыҙы

**ТУРМАЛИ́Н** *м* турмалин (*минерал, ҡыҙғылт төҫтәге кристаллик таш*)

**ТУРМАЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое турмалин …ы, турмалин; **турмали́новый пе́рстень** турмалин йөҙөк

**ТУ́РМАН** *м* турман, әйләнсек күгәрсен (*мәтәлләп оса торған йорт күгәрсененең бер төрө*)

**ТУРНЕ́** *с нескл.* турне (**1.** *урап йөрөп ҡайтыу, сәйәхәт* **2.** *артистарҙың гастролгә сығыуы*)

**ТУРНЕ́ПС** *м* мал шалҡаны, турнепс

**ТУРНИ́К** *м* турник; **упражне́ния на турнике́** турникта күнегеүҙәр (күнекмәләр)

**ТУРНИКЕ́Т** *м* турникет (*әйләнмәле ҡапҡа*)

**ТУРНИ́Р** *м* ярыш, турнир; **ша́хматный турни́р** шахмат ярышы

**ТУРНИ́РНЫЙ,** -ая, -ое турнир …ы; **турни́рный матч** турнир матчы

**ТУРНУ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* ҡыуыу, ҡыуып ебәреү, төртөп сығарыу

**ТУРПА́Н** *м* ҡарасабан, ҡара өйрәк

**ТУРУХТА́Н** *м* ҡорохтан, күркәбаш, яр көйөлдөһө (*ҡош*)

**ТУ́СКЛОСТЬ** *ж* **1.** (*мутность*) тоноҡлоҡ, **2.** (*блёклость*) төҫһөҙлөк **3.** (*неяркость*) тоноҡлоҡ **4.** *перен.* (*невыразительность*) нурһыҙлыҡ, тоноҡлоҡ **5.** *перен.* (*бессодержательность*) күңелһеҙлек, ҡыҙыҡһыҙ

**ТУ́СКЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*непрозрачный*) тоноҡ; **ту́склое стекло́** тоноҡ быяла **2.** (*нечёткий — о контурах*) асыҡ күренмәгән **3.** (*неяркий*) бөләңгерт, тоноҡ; **ту́склый свет** тоноҡ яҡтылыҡ; **ту́склый огонёк** бөләңгерт ут **4.** (*выцветший*) баҙыҡ булмаған, төҫһөҙ **5.** *перен.* (*невыразительный*) нурһыҙ, тоноҡ; **ту́склые глаза́** нурһыҙ күҙҙәр **6.** *перен.* (*неинтересный*) күңелһеҙ, дәрт (илһам) бирмәгән, ҡыҙыҡһыҙ; **ту́склая жизнь** күңелһеҙ тормош

**ТУСКНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** тоноҡланыу, төҫһөҙләнеү, аҡсалланыу; **серебро́ тускне́ет** көмөш тоноҡлана **2.** *перен.* нурһыҙланыу, тоноҡланыу, бөләңгертләнеү, нуры китеү; **ра́дость тускне́ет** шатлыҡ тоноҡланды

**ТУ́СКНУТЬ** *несов.*; *разг. см.* **тускне́ть**

**ТУТ I** *нареч.*; *разг.* **1.** (*здесь*) бында, был урында; **тут жа́рко** бында эҫе **2.** (*тогда*) шул ваҡытта, шул саҡта; **тут расска́зчик замолча́л** шул саҡта һөйләүсе тынды **3.** *в знач. частицы* (*в сочетании со словами "какой", "где", "когда", "куда"*) ниндәй ул, ҡасан ул, ҡайҙа ул; **кака́я тут любо́вь?** ҡайҙа ул мөхәббәт? ♦ **не ту́т-то бы́ло** беҙ уйлағанса булманы; **тут как тут** *в знач. сказ.* шунда уҡ (көтмәгәндә) килеп тә сыҡты

**ТУТ II** *м* и **ТУ́ТА** *ж* тут, тут (ебәк) ағасы

**ТУ́ТОВНИК** *м см.* **тут** II

**ТУТОВО́ДСТВО** *с* тут (ебәк) ағасы үҫтереү

**ТУТОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тут (ебәк) ағасы үҫтереү …ы

**ТУ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** тут …ы; **ту́товые я́годы** тут емеше **2.** *в знач. сущ.* **ту́товые** *мн.*; *бот.*

тут ағастары ғаиләһе (*фикус, сикомор һ.б.*) ♦ **ту́товое де́рево** тут (ебәк) ағасы

**ТУФ** *м* туф (*тау тоҡомо*) ♦ **известко́вый туф** эзбизле туф

**ТУ́ФЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое туфли ...ы; **ту́фельная коло́дка** туфли ҡалыбы

**ТУ́ФЛИ** *мн.* (*ед.* **ту́фля** *ж*) туфли; **же́нские ту́фли** ҡатын-ҡыҙҙар туфлийы; **ходи́ть в ту́флях** туфли кейеп йөрөү

**ТУФОБЕТО́Н** *м* туфлы бетон

**ТУ́ФОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** туф ...ы; **ту́фовая ла́ва** туф лаваһы **2.** туф, туфтан эшләнгән; **дом из ту́фовых бло́ков** туфтан эшләнгән йорт

**ТУХЛИ́НКА** *ж*; *разг.* һаҫыҡ еҫ; (*о мясе, рыбе*) һөрһөгән еҫ; **мя́со с тухли́нкой** һөрһөгән еҫле ит

**ТУ́ХЛЫЙ,** -ая, -ое еҫләнгән, һаҫыған; (*о мясе, рыбе*) һөрһөгән

**ТУХЛЯ́ТИНА** *ж*; *разг.* **1.** *собир.* боҙолған (һаҫыған) аҙыҡ-түлек **2.** (*запах*) һаҫыҡ (һөрһөгән) еҫ

**ТУ́ХНУТЬ I** *несов.* **1.** (*гаснуть*) һүнеү; **костёр ту́хнет** усаҡ һүнә **2.** *перен.* (*ослабевать*) һүнеү, һүнә (кәмей) барыу

**ТУ́ХНУТЬ II** *несов.* (*загнивать*) һаҫыу, еҫләнеү; (*о мясе, рыбе*) һөрһөү; **ры́ба ту́хнет бы́стро** балыҡ тиҙ еҫләнә

**ТУ́ЧА** *ж* **1.** болот; **грозова́я ту́ча** йәшен болото; **ту́чи собира́ются** болоттар ҡабара **2.** *кого-чего* (*множество*) бик күп, болот, болот кеүек, өйөр; **ту́ча комаро́в** серәкәй болото ♦ **ту́ча ту́чей** бик күңелһеҙ, йөҙө ҡарайған; **сгусти́лись ту́чи** баш осонда ҡара болоттар ҡуйырған

**ТУЧЕВО́Й,** -ая, -ое болот ...ы; **тучева́я тень** болот күләгәһе

**ТУЧНЕ́ТЬ** *несов.* (*о человеке*) һимереү, йыуанайыу, ҡалынайыу; (*о животном*) ит-май ултырыу, көрәйеү, һимереү; (*о зерне*) тосланыу; (*о траве*) һутланыу; **скот тучне́ет** мал көрәйә

**ТУ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** (*полнота*) һимеҙлек, көрлөк, йыуанлыҡ **2.** (*плодородие почвы*) уңдырышлылыҡ **3.** (*полновесность зерна*) тослоҡ **4.** (*сочность и густота травы*) ҡуйылыҡ, һутлылыҡ

**ТУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о человеке*) йыуан, һимеҙ; (*о животном*) һимеҙ, көр; **ту́чный скот** һимеҙ мал **2.** (*плодородный*) ашлы, уңдырышлы; **ту́чный чернозём** уңдырышлы ҡара тупраҡ **3.** (*о зерне*) тос **4.** (*о траве*) ҡуйы, һутлы; **ту́чные луга́** ҡуйы үләнле болондар

**ТУШ** *м* туш (*тантаналы ҡотлау музыкаһы*)

**ТУ́ША** *ж* **1.** түшкә; **говя́жья ту́ша** һыйыр түшкәһе **2.** *разг., пренебр.* (*о тучном человеке*) ит бүкәне

**ТУШЕ́** *с нескл.* туше (**1.** *муз. музыка ҡоралында уйнаусының баҫмаҡтарға баҫыу ысулы* **2.** *спорт. көрәштә көрәшсенең ҡалаҡ һөйәген ергә тейҙерең — еңең билгеһе*)

**ТУШЕВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тушь ...ы, ҡарайтыу ...ы; **тушева́льный каранда́ш** ҡарайтыу ҡәләме

**ТУШЕВА́ТЬ** *несов. что* **1.** ҡарайтыу, күләгәләндереү (*һүрәт төшөргәндә*); **тушева́ть рису́нок** һүрәтте ҡарайтыу **2.** *перен.* (*затемнять*) ҡараңғылау

**ТУШЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*смущаться*) ҡаушау, ҡойолоп төшөү, шөрләү **2.** *страд. от* **тушева́ть**

**ТУШЁВКА** *ж* **1.** *см.* **тушева́ть** 1; **2.** (*тени, штрихи*) нәҙек һыҙыҡтар

**ТУ́ШЕВЫЙ,** -ая, -ое тушь ...ы, тушь менән яһалған; **ту́шевые черни́ла** тушь ҡараһы

**ТУШЕ́НИЕ I** *с см.* **туши́ть** I; **туше́ние пожа́ра** янғын һүндереү

**ТУШЕ́НИЕ II** *с см.* **туши́ть** II; **туше́ние мя́са** ит быҡтырыу

**ТУШЁНКА** *ж*; *разг.* быҡтырылған ит

**ТУШЁНЫЙ,** -ая, -ое быҡтырылған; **тушёное мя́со** быҡтырылған ит

**ТУШИ́ЛКА** *ж* күмер һүндергес

**ТУШИ́ТЬ I** *несов.* **1.** *что* һүндереү; **потуши́ть папиро́су** папиросты һүндереү **2.** *перен.* (*подавлять*) баҫыу, хис-тойғоно юҡ итеү, бөтөрөү, һүндереү; **туши́ть гнев** асыуҙы баҫыу

**ТУШИ́ТЬ II** *несов. что* томалап бешереү, быҡтырыу; **туши́ть о́вощи** йәшелсәне быҡтырып бешереү

**ТУ́ШКА** *ж*; *уменьш. от* **ту́ша**; **ту́шка за́йца** ҡуян түшкәһе

**ТУШКА́НЧИК** *м* ялман (*кимереүсе*); **нора́ тушка́нчика** ялман өңө

**ТУШЬ** *ж* тушь; **цветна́я тушь** төҫлө тушь; **писа́ть ту́шью** тушь менән яҙыу

**ТУ́Я** *ж* туя, сауыр (*мәңге йәшел ылыҫлы ҡыуаҡ*)

**ТЩА́ТЕЛЬНО** *нареч.* ентекләп, асылына төшөнөп, бөтәһен иҫәпкә алып, төпсөп; **тща́тельно иссле́довать** ентекләп тикшереү

**ТЩА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ентеклелек; **тща́тельность о́пыта** тәжрибәнең ентеклелеге

**ТЩА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ентекле, ентекләп эшләнгән; **тща́тельная подгото́вка** ентекле әҙерлек; **тща́тельное изуче́ние вопро́са** мәсьәләне ентекле өйрәнеү; **тща́тельная рабо́та** ентекләп эшләнгән эш

**ТЩЕДУ́ШИЕ** *с* хәлһеҙлек, көсһөҙлөк, кәрһеҙлек

**ТЩЕДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое хәлһеҙ, көсһөҙ, кәрһеҙ; **тщеду́шный челове́к** хәлһеҙ кеше

**ТЩЕСЛА́ВИЕ** *с* маһайыусанлыҡ, данлыҡҡа (шөһрәткә) ынтылыусанлыҡ

**ТЩЕСЛА́ВНОСТЬ** *ж* шөһрәт (дан) яратыу, шөһрәт (дан) яратыусанлыҡ, маһайыусанлыҡ

**ТЩЕСЛА́ВНЫЙ,** -ая, -ое шөһрәт (дан) яратҡан, маһайыусан

**ТЩЕТА́** *ж*; *уст.*, *книжн.* файҙаһыҙлыҡ, нәтижәһеҙлек, мәғәнәһеҙлек

**ТЩЕ́ТНОСТЬ** *ж* файҙаһыҙлыҡ, файҙаһыҙ булыу; **тще́тность уси́лий** тырышыуҙың файҙаһыҙлығы

**ТЩЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое файҙаһыҙ, буш; **тще́тные наде́жды** файҙаһыҙ өмөттәр

**ТЫ** (тебя, тебе, тебя, тобой, о тебе) *мест.* **1.** һин; **ты ли э́то?** һинме был?; **тебе́ изве́стно** һиңә билдәле **2.** *в знач. частицы*; *разг.* һин; **ах, ты, га́дость кака́я!** ах, һин, әшәке! ♦ **быть на "ты"** бик яҡын булыу, әшнә булыу; **вот тебе́ и на** *см.* **на** II

**ТЫ́КАТЬ I** *несов.*; *разг.* **1.** *что*, *чем* төртөү; **ты́кать в ребро́** ҡабырғаға төртөү **2.** *что* (*втыкать, вонзать*) ҡаҙау, сәнсеү; **ты́кать ви́лкой** сәнске менән сәнсеү **3.** *перен.* (*напоминать*) иҫкәртеү, иҫкә төшөрөү **4.** *что*, *чем* тығыу, ҡыҫтырыу; **ты́кать ключо́м в замо́к** асҡысты йоҙаҡҡа тығыу ♦ **ты́кать в глаза́** шелтәләү, төртөп күрһәтеү; **ты́кать па́льцем** *на кого-что кемгәлер-нимәгәлер* төртөп күрһәтеү

**ТЫ́КАТЬ II** *несов. кого* и *без доп.*; *прост.* "һин" тип өндәшеү ("*һеҙ*" *урынына*)

**ТЫ́КАТЬСЯ** *несов.* **1.** *прост.* (*лезть куда-л.*) тығылыу, ҡыҫылыу **2.** төртөлөү, бәрелеү; **ты́каться в сте́ну** стенаға бәрелеү **3.** ҡаҙалыу, сәнселеү; **ты́каться но́сом в снег** танау менән ҡарға ҡаҙалыу

**ТЫ́КВА** *ж* ҡабаҡ; **кормова́я ты́ква** мал ҡабағы

**ТЫ́КВЕННИК** *м* ҡабаҡ бутҡаһы

**ТЫ́КВЕННЫЙ,** -ая, -ое ҡабаҡ ...ы; **ты́квенная ка́ша** ҡабаҡ бутҡаһы; **ты́квенное се́мя** ҡабаҡ орлоғо

**ТЫЛ** *м* **1.** (*задняя часть чего-л.*) һырт, арт яҡ; **подойти́ с ты́ла** арт яҡтан килеү **2.** (*территория позади линии фронта*) тыл, арт; **получа́ть по́мощь с ты́ла** тылдан ярҙам алыу **3.** (*территория воюющей страны в противоположность фронту*) тыл; **тру́женики ты́ла** тыл эшсәндәре

**ТЫЛОВИ́К** *м* тылда хеҙмәт итеүсе

**ТЫЛОВО́Й,** -ая, -ое **1.** тылдағы, тылда була торған; **тыловы́е во́инские ча́сти** тылдағы хәрби частар **2.** *см.* **ты́льный**; **тылова́я сторона́** арт яҡ

**ТЫ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое арт, арттағы, һырт; **ты́льная сторона́ ладо́ни** ҡул һырты; **ты́льная сторона́** арт яҡ

**ТЫН** *м* ҡойма, текмә; **дубо́вый тын** имән ҡойма

**ТЫ́СЯЧА** *числ.* **1.** мең; **две ты́сячи рубле́й** ике мең һум **2.** *обычно мн.* **ты́сячи** меңәрләгән, меңәр; **ты́сячи люде́й** меңәр кеше

**ТЫСЯЧЕ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙәге "мең", "меңдәрсә", "меңәр" мәғәнәләрен аңлатҡан тәүге өлөшө, мәҫ.*, **тысячегра́нный** мең яҡлы; **тысячезвёздный** меңдәрсә йондоҙло; **тысячевёрстный** меңәр саҡрымлыҡ

**ТЫСЯЧЕКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое мең ҡат (тапҡыр)

**ТЫСЯЧЕЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) мең йыл, мең йыллыҡ; **прошло́ тысячеле́тие** мең йыл үтте **2.** (*годовщина чего-л.*) мең йыл тулыу, мең йыллыҡ

**ТЫСЯЧЕЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** мең йыллыҡ; **тысячеле́тняя исто́рия** мең йыллыҡ тарих **2.** (*существующий тысячу лет*) мең йәшлек (йәштәге, йәшәр)

**ТЫСЯЧЕЛИ́СТНИК** *м* меңъяпраҡ; **насто́й тысячели́стника** меңъяпраҡ төнәтмәһе

**ТЫСЯЧЕРУБЛЁВЫЙ,** -ая, -ое мең һумлыҡ

**ТЫ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *числ.* меңенсе; **ты́сячный киломе́тр** меңенсе километр **2.** меңләгән, бихисап; **ты́сячная толпа́ люде́й** меңләгән халыҡ төркөмө **3.** (*многократный*) меңенсе; **ты́сячный раз** меңенсе мәртәбә **4.** (*получаемый от деления на тысячу*) меңдән бер; **ты́сячная до́ля секу́нды** секундтың меңдән бер өлөшө

**ТЫЧИ́НА** *ж*; *разг.* ваҡ ҡаҙыҡ (*ергә ҡаҙалған*)

**ТЫЧИ́НКА** *ж*; *бот.* һеркә япрағы, һеркәлек

**ТЫЧИ́НКОВЫЙ** и **ТЫЧИ́НОЧНЫЙ,** -ая, -ое һеркә ...ы, һеркәлек ...ы; **тычи́ночная нить** һеркәлек ебе

**ТЫЧО́К** *м*; *разг.* төртөү; **тычо́к в спи́ну** арҡаға төртөү

**ТЬМА I** *ж* **1.** ҡараңғылыҡ; **у́тренняя тьма** иртәнге ҡараңғылыҡ **2.** *перен.* (*невежество*) наҙанлыҡ, томаналыҡ

**ТЬМА II** *ж* **1.** *чего*; *разг.* (*множество*) бик күп, хисапһыҙ, бихисап; **наро́ду тьма** бихисап халыҡ **2.** *уст.* (*в древнерусском счёте*: *десять тысяч*) ун мең ♦ **тьма-тьму́щая** *прост.* иҫәбе-хисабы юҡ

**ТЬФУ** *межд.* **1.** тфү (*төкөрөүгә оҡшатыу*) **2.** *в знач. сказ.*; *прост.* (*наплевать*) төкөрәм; **да мне на тебя́ — тьфу!** төкөрәм мин һиңә!

**ТЮБЕТЕ́ЙКА** *ж* таҡыя, түбәтәй

**ТЮ́БИК** *м* тюбик, һыҡма; **тю́бик кре́ма** крем тюбигы

**ТЮК** *м* ҙур төргәк, төк, бәйләм; **тюк сукна́** буҫтау төгө

**ТЮКОВА́ТЬ** *несов.*; *спец.* төкләү, төккә бәйләү, төргәкләү; **тюкова́ть се́но** бесәнде төкләү

**ТЮКО́ВКА** *ж*; *спец. см.* **тюкать**

**ТЮ́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое селтәр, тюль; **тю́левые занаве́ски** селтәр пәрҙәләр

**ТЮЛЕНЕБО́ЕЦ** *м* тюлень аулаусы

**ТЮЛЕНЕБО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое тюлень аулау ...ы, тюлень аулау менән шөғөлләнгән; **тюленебо́йное су́дно** тюлень аулау судноһы

**ТЮЛЕ́НЕВЫЙ,** -ая, -ое тюлень ...ы; **тюле́невый про́мысел** тюлень промыслаһы

**ТЮЛЕ́НИЙ,** -ья, -ье тюлень ...ы; **тюле́ний жир** тюлень майы

**ТЮЛЕ́НИНА** *ж* тюлень ите

**ТЮЛЕ́НЬ** *м* **1.** тюлень (*һөтимәр диңгеҙ хайуаны*) **2.** *перен.* (*о неуклюжем человеке*) ибәтәйһеҙ, ипһеҙ (*кеше*)

**ТЮЛЬ** *м* селтәр, тюль

**ТЮ́ЛЬКА** *ж* тюлька (*диңгеҙ балығы*)

**ТЮЛЬПА́Н** *м* ләлә, тюльпан; **тюльпа́н двухцве́тный** ала сәскәле тюльпан; **тюльпа́н лесно́й** урман тюльпаны

**ТЮРБА́Н** *м* сәллә, салма

**ТЮРЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое төрмә ...ы; **тюре́мный страж** төрмә һаҡсыһы; **тюре́мное заключе́ние** төрмәгә ябыу

**ТЮРЕ́МЩИК** *м*; *разг.*, *уст.* төрмә һаҡсыһы, төрмәсе **2.** *перен.* (*угнетатель*) иҙеүсе, ҡыҫыусы

**ТЮ́РКИ** *мн.* төркиҙәр

**ТЮРКИ́** *с нескл.* (*арабографический книжный язык*) төрки (*Урта Азия һәм Урал-Волга өлкәләрендә йәшәгән халыҡтар өсөн XII—XIII бб. Октябрь революцияһына тиклемге осорҙа уртаҡ яҙма тел вазиваһын үтәгән гәрәп яҙыулы китап теле*)

**ТЮРКО́ЛОГ** *м* төркиәтсе, тюрколог (*тюркология белгесе*)

**ТЮРКОЛО́ГИЯ** *ж* төркиәт, тюркология (*төрки халыҡтарын өйрәнеү фәне*)

**ТЮ́РКСКИЙ,** -ая, -ое төрки; **тю́ркские наро́ды** төрки халыҡтар; **тю́ркские языки́** төрки телдәр

**ТЮРЬМА́** *ж* төрмә; **заточи́ть в тюрьму́** төрмәгә ултыртыу ♦ **тюрьма́ пла́чет** урыны төрмәлә

**ТЮ́РЯ** *ж* тюра (*һыуға йәки кеүәскә икмәк менән һуған туралған ашамлыҡ*)

**ТЮ́ТЕЛЬКА: тю́телька в тю́тельку** *прост.* (*точь-в-точь*) тап, нәҡ, теп-теүәл

**ТЮ-ТЮ́** *межд. в знач. сказ.* тү-тү, юҡ, бөттө

**ТЮТЮ́Н** *м*; *прост.* тәмәке (*насар төрө*)

**ТЮФЯ́К** *м* **1.** түшәк **2.** *перен.*, *разг.* (*о безвольном человеке*) йомшаҡ (булдыҡһыҙ) кеше

**ТЯ́ВКАНЬЕ** *с см.* **тя́вкать**

**ТЯ́ВКАТЬ** *несов.* сәңкелдәү, ләңкелдәү, сәңкелдәп өрөү; **соба́ки тя́вкают** эттәр сәңкелдәп өрә

**ТЯ́ВКНУТЬ** *сов.* сәңк итеү, өрөп ҡуйыу

**ТЯГ: дать (зада́ть) тя́гу** *прост.* тайыу, һыпыртыу, табан ялтыратыу

**ТЯ́ГА** *ж* **1.** *см.* **тяну́ть** 1, 3, 7, 9, **тяну́ться** 5; **тя́га не́вода** йылымды тартыу **2.** тартыу көсө; **парова́я тя́га** пар менән тартыу көсө; **реакти́вная тя́га** реактив тартыу көсө **3.** *спец.* тартыу; **парово́зная тя́га** паровоз тартыуы **4.** (*в печи*) тартыу, һурыу; **в печи́ хоро́шая тя́га** мейес һәйбәт тарта **5.** *перен.* (*стремление*) ынтылыш, тартым, тартыу; **тя́га к нау́ке** фәнгә ынтылыш; **душе́вная тя́га** күңел тартыуы

**ТЯГА́ТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** (*тащить*) һөйрәү, тартыу **2.** *перен.* (*привлекать к ответственности*) яуапҡа тарттырыу

**ТЯГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* (*соперничать*) ярышыу, уҙышыу, көрәшеү, көс һынашыу, алышыу; **с ни́ми тяга́ться тру́дно** улар менән ярышыу ҡыйын **2.** *уст.* (*судиться*) дәғүәләшеү, дәғүәләшеп талашыу, тартышыу, даулашыу **3.** *страд. от* **тяга́ть**

**ТЯГА́Ч** *м* тягач, йөк тракторы

**ТЯ́ГЛО** *с собир.* (*рабочий скот*) екке мал

**ТЯ́ГЛОВЫЙ,** -ая, -ое тартыу ...ы, екке; **тя́гловая си́ла** тартыу (эш) көсө; **тя́гловый скот** екке мал

**ТЯ́ГОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** тартыу ...ы; **тя́говая си́ла ло́шади** аттың тартыу көсө **2.** тартыусы, тарта торған; **тя́говый кана́т** тарта торған канат

**ТЯ́ГОСТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ауыр, ҡыйын; **тя́гостная рабо́та** ауыр эш **2.** (*неприятный, мучительный*) яфалы, ғазаплы, күңелһеҙ; **тя́гостное зре́лище** күңелһеҙ күренеш

**ТЯ́ГОСТЬ** *ж* **1.** *в разн. знач.* ауырлыҡ, мәшәҡәт, ҡыйынлыҡ, ауыр йөк; **тя́гость нало́гов** налог ауырлығы; **ли́шняя тя́гость** артыҡ мәшәҡәт **2.** хәлһеҙлек, ауырлыҡ; **чу́вствовать тя́гость в те́ле** тәндә хәлһеҙлек тойоу

**ТЯ́ГОТЫ** *мн.* ауырлыҡтар; **тя́готы вое́нного вре́мени** һуғыш йылдарының ауырлыҡтары

**ТЯГОТЕ́НИЕ** *с* **1.** *физ.* тартылыш, тартыу; **зако́н всеми́рного тяготе́ния** бөтә ғаләм тартылыш законы; **си́ла тяготе́ния** тартылыш көсө **2.** (*стремление*) тартылыу, ынтылыш; **тяготе́ние к нау́ке** фәнгә ынтылыш **3.** (*потребность в связи с кем-чем-л.*) тартылыу

**ТЯГОТЕ́ТЬ** *несов.* **1.** тартылыу; **тяготе́ть к земле́** ергә тартылыу **2.** *к кому-чему* (*испытывать влечение, склонность*) тартылыу, мауығыу, күңел ятыу; **тяготе́ть к иску́сству** сәнғәткә күңел ятыу **3.** баҫып тороу, иҙеп тороу, ауырлыҡ булып тороу; **над ро́дом тяготе́ет рок** нәҫелдә ҡәһәр баҫып тора

**ТЯГОТИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** (*отягощать*) ауырлыҡ һалыу (төшөрөү) **2.** (*мешать кому-л.*) ҡамасаулау, мәшәҡәтләү **3.** яфалау, ғазаплау; **меня́ тяготи́т его́ отноше́ние** уның мөнәсәбәте мине яфалай

**ТЯГОТИ́ТЬСЯ** *несов. кем-чем* ауырлыҡ кисереү, ауырһыныу, ҡыйынһыныу; **тяготи́ться свои́м одино́чеством** үҙеңдең яңғыҙлығыңдан ауырһыныу

**ТЯГУ́ЧЕСТЬ** *ж* **1.** һуҙылыусанлыҡ; **тягу́честь ко́жи** тиренең һуҙылыусанлығы **2.** (*вязкость*) йәбешеүсәнлек, йәбешкәклек; **тягу́честь кле́я** елемдең йәбешкәклеге **3.** (*густота*) ҡуйылыҡ **4.** *перен.* (*томительность*) бер төрлөлөк, ялҡытҡыслыҡ **5.** *перен.* (*протяжность — о мелодии*) һалмаҡлыҡ

**ТЯГУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** (*способный растягиваться*) һуҙылыусан, һуҙыла (тартыла) торған **2.** (*густой*) ҡуйы; **тягу́чий мёд** ҡуйы бал **3.** (*вязкий*) йәбешкәк **4.** *перен.* оҙон, һалмаҡ; **тягу́чий моти́в** оҙон көй **5.** *перен.* ялҡытҡыс, бер төрлө, дәрт (илһам) бирмәгән, күңелһеҙ; **тягу́чая жизнь** ялҡытҡыс тормош

**ТЯЖ** *м* **1.** *спец.* ҡайыш бау (*тартыу көсөн күсерә торған*) **2.** тәзе; **тяж теле́ги** арба тәзеһе; **тяжи́ тормозно́го ва́ла** тормоз валының тәзеһе **3.** *анат.* бау; **сосу́дистый тяж** тамырлы бау

**ТЯ́ЖБА** *ж* **1.** *уст.* даулашыу, дәғүәләшеү; **тя́жба о насле́дстве** мираҫ өсөн дәғүәләшеү **2.** *перен.* (*спор, состязание*) һүҙ көрәштереү, бәхәс, талаш-тартыш

**ТЯЖЕЛЕ́ТЬ** *несов.* **1.** ауырайыу, ауырлығы артыу, ауырая төшөү **2.** (*испытывать утомление — о частях тела*) ауырайыу; **ве́ки тяжеле́ют** күҙ ҡабаҡтары ауырая **3.** *перен.* (*становиться тяжеловесным — о речи, стиле и т.п.*) ауырайыу, тупаҫланыу

**ТЯЖЕЛО́** **1.** *нареч.* ауыр, һалмаҡ; **тяжело́ ступа́ть** һалмаҡ баҫыу **2.** *нареч.* (*серьёзно*) ҡаты; **она́ тяжело́ больна́** ул ҡаты ауырый **3.** *нареч.* (*трудно*) ауыр, күңелгә ҡыйын; **тяжело́ пережива́ть** ауыр кисереү **4.** *в знач. сказ., безл.* күңелһеҙ, ауыр; **мне тяжело́** миңә күңелһеҙ

**ТЯЖЕЛО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "ауыр", "ҡаты" мәғәнәһендәге тәүге өлөшө, мәҫ.*, **тяжелора́неный** ауыр яралы

**ТЯЖЕЛОАТЛЕ́Т** *м* ауыр атлет

**ТЯЖЕЛОАТЛЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ауыр атлет(тар) ...ы; **тяжелоатлети́ческие соревнова́ния** ауыр атлеттар ярышы

**ТЯЖЕЛОВЕ́С** *м* ҙур ауырлыҡтағы көрәшсе

**ТЯЖЕЛОВЕ́СНОСТЬ** *ж* ауырлыҡ, һалмаҡлыҡ; **тяжелове́сность сти́ля** стилдең ауырлығы

**ТЯЖЕЛОВЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тос, һәлмәк; **тяжелове́сный кула́к** тос йоҙроҡ **2.** һалмаҡ, шөҡәтһеҙ; **тяжелове́сные шаги́** һалмаҡ аҙымдар **3.** *перен.* ауыр, тупаҫ; **тяжелове́сный стиль** ауыр стиль **4.** *ж.-д., тех.* ауыр йөклө; **тяжелове́сный железнодоро́жный соста́в** ауыр йөклө тимер юл составы

**ТЯЖЕЛОВО́З** *м* йөк аты

**ТЯЖЕЛОДУ́М** *м*; *разг. см.* **тугоду́м**

**ТЯЖЁЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* ауыр; **тяжёлые ве́щи** ауыр әйберҙәр; **тяжёлая пи́ща** ауыр аҙыҡ **2.** (*трудный*) ауыр, ҡыйын; **тяжёлый труд** ауыр эш **3.** ауыр, һалмаҡ; **тяжёлая похо́дка** һалмаҡ атлау **4.** (*серьёзный*) ауыр, ҡаты; **тяжёлое заболева́ние** ҡаты сир **5.** (*неприятный в общении*) ауыр, насар; **тяжёлый хара́ктер** ауыр холоҡ **6.** (*суровый, жестокий*) ҡаты, ауыр; **тяжёлое преступле́ние** ауыр енәйәт **7.** ҡайғылы, ауыр; **тяжёлое чу́вство** ауыр тойғо **8.** (*сильный*) көслө, ныҡ, ҡаты; **тяжёлый уда́р** ныҡ һуғыу **9.** (*полный трудностей, забот*) мохтаж, ауыр, ҡыйын ♦ **тяжёлая атле́тика** ауыр атлетика; **тяжёлая промы́шленность** ауыр сәнәғәт; **тяжёлая рука́**: 1) ҡаты ҡуллы; 2) ҡул арты ауыр; **тяжёлый на подъём** ауыр ҡуҙғалыусан

**ТЯ́ЖЕСТЬ** *ж* **1.** *физ.* тартыу, тартылыш; **си́ла тя́жести** тартыу көсө **2.** (*тяжёлый предмет, груз*) ауыр әйбер (йөк); **таска́ть тя́жести** ауыр әйберҙәр ташыу **3.** (*суровость, серьёзность*) ауырлыҡ, ҡатылыҡ; **тя́жесть наказа́ния** хөкөмдөң ҡатылығы **4.** ауырлыҡ, һалмаҡлыҡ **5.** (*трудность*) ауырлыҡ, ҡыйынлыҡ **6.** (*что-л. неприятное, дурное*) ауырлыҡ, насарлыҡ ♦ **центр тя́жести** асыл, (төп) нигеҙ

**ТЯ́ЖКИЙ,** -ая, -ое *см.* **тяжёлый**; **тя́жкий труд** ауыр эш; **тя́жкая вина́** ауыр ғәйеп

**ТЯНУ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* тартыу, һөйрәү; **тяну́ть не́вод** йылымды һөйрәү **2.** *что* (*натягивать*) һуҙыу, үткәреү, тартыу; **тяну́ть телефо́нную ли́нию** телефон линияһы үткәреү **3.** *кого-что* (*тащить*) тартыу, һөйрәү; **тяну́ть за рука́в** еңенән тартыу **4.** *что* (*протягивать*) һуҙыу, һоноу; **тяну́ть ру́ку** ҡул һуҙыу **5.** *кого-что* (*привлекать*) тартыу; **тя́нет к родны́м места́м** тыуған яҡтарға тарта **6.** *кого-что*; *разг.* (*просить пойти*) һөйрәү, әйәртеү, саҡырыу; **тяну́ть с собо́й в кино́** киноға әйәртеү **7.** *безл.* (*о струе воздуха, запаха*) килеү, аңҡыу; **от окна́ тя́нет хо́лодом** тәҙрәнән һалҡын килә **8.** (*обладать тягой*) тартыу; **пе́чка хорошо́ тя́нет** мейес яҡшы тарта **9.** *что* (*всасывать*) тартыу, һурыу; **насо́с тя́нет во́ду** насос һыуҙы һура **10.** *что, с чем* (*медлить*) һуҙыу; **тяну́ть с отве́том** яуап биреүҙе һуҙыу **11.** (*весить*) тартыу; **ма́сло тя́нет полкило́** май ярты кило тарта ♦ **тяну́ть жи́лы** хәлен алыу, интектереү; **тяну́ть за́ душу** теңкәгә тейеү; **тяну́ть за язы́к** көсләп һөйләтеү; **тяну́ть ля́мку** *см.* **ля́мка**

**ТЯНУ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*увеличиваться в длину*) һуҙылыу; **рези́нка тя́нется** резинка һуҙыла **2.** (*потягиваться*) кирелеү; **тяну́ться в посте́ли** урында кирелеү **3.** (*простираться*) һуҙылып китеү, йәйелеү; **за го́родом тя́нется степь** ҡаланан ситтә дала һуҙыла **4.** (*длиться*) дауам итеү, һуҙылыу; **де́ло тя́нется до́лго** эш оҙаҡҡа һуҙыла **5.** *к кому-чему* (*стремиться*) ынтылыу, һуҙылыу, тартылыу; **цвето́к тя́нется к со́лнцу** сәскә ҡояшҡа тартыла **6.** (*двигаться один за другим*) хәрәкәт итеү, үтеү; **по доро́ге тя́нутся обо́зы** юл буйлап ылауҙар һуҙылған **7.** тартылыу, ынтылыу; **тяну́ться к уче́нию** уҡыуға ынтылыу **8.** *с кем*; *разг.* (*тягаться*) тиңләшергә тырышыу **9.** *страд. от* **тяну́ть** 1—3, 6, 9, 10

**ТЯНУ́ЧКА** *ж*; *разг.* һөтлө кәнфит

**ТЯП** *межд.* туҡ (*һуҡҡан, сапҡан тауыш*) ♦ **тяп да ляп**; **тяп-ляп** ашыҡ-бошоҡ, нисек етте шулай (*эшләү*)

**ТЯ́ПАТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *прост.* (*рубить, сечь*) сабыу, сабып өҙөү

**ТЯ́ПКА** *ж* **1.** кәтмән, тәпке (*ер эшкәртеү өсөн*) **2.** сапҡы, тапауыс (*ит һ.б. тапау, турау өсөн*)

**ТЯ́ПНУТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *см.* **тя́пать** **2.** *кого-что* (*укусить*) тешләү **3.** *кого-что* (*украсть*) урлап алыу

**ТЯ́ТЯ** *м*; *прост., обл.* ата, атай

# У

**У I** *межд.* (*обычно употребляется удлинённо для обозначения гудения, воя*) у-у, у-у-у; **в лесу́ разда́лся вой во́лка: у-у-у** урманда “у-у-у” тигән бүре олоуы ишетелде

**У II** *межд.* **1.** (*выражает укоризну, угрозу, негодование*) ух, уй; **у, безобра́зник** ух, тәртипһеҙ **2.** (*выражает испуг, страх*) уй, абау; **у, как стра́шно** уй, ҡайһылай ҡурҡыныс **3.** (*выражает одобрение, восторг, восхищение*) аһ, уй; **у, э́то замеча́тельно** аһ, был бик шәп

**У III** *предлог с род. п.* **1.** (*возле, около*) эргәһендә, янында, төбөндә, буйында; **стоя́ть у окна́** тәҙрә эргәһендә тороу; **сиде́ть у воро́т** ҡапҡа төбөндә ултырыу; **разгова́ривать у две́ри** ишек төбөндә һөйләшеү; **дом у бе́рега** яр буйындағы өй **2.** (*при обозначении обладателя, владельца чего-л. или носителя каких-л. свойств, качеств*) -дың/-деҥ; **еди́нственнный сын у роди́телей** атаәсәһенең берҙән-бер улы; **у певца́ си́льный, краси́вый го́лос** йырсының тауышы көслө, матур; **две́рца у шка́фа сло́мана** шкафтың ҡапҡасы ватылған **3.** (*при обозначении лиц, в присутствии, ведении которых что-л. происходит*) -да/-дә; **жить у бра́та** ағаһында йәшәү (тороу); **у нас сего́дня собра́ние** беҙҙә бөгөн йыйылыш **4.** (*при указании на источник получения, приобретения чего-л.*) -дан/-дән; **купи́ть кни́гу у букини́ста** букинистан китап һатып алыу; **спроси́ть у учи́теля** уҡытыусынан һорау ♦ **не у дел** *см.* **де́ло**; **не у ме́ста** *см.* **ме́сто**

**У...** *приставка* **1.** *ҡылым яһауҙа ҡулланылып, түбәндәге мәғәнәләрҙе аңлата*: 1) *хәрәкәттең ситкә йүнәлешен, мәҫ.*, **увезти́** алып китеү; **улете́ть** осоп китеү; **ускака́ть** сабып китеү; 2) *бер нәмәне бүлеүҙе, кәметеүҙе, ҡыҫҡартыуҙы, мәҫ.*, **урва́ть вре́мя** аҙ ғына ваҡыт бүлеү; **укороти́ть пла́тье** күлдәкте ҡыҫҡартып алыу; 3) *хәрәкәттең тулылығын, таралышын, мәҫ.*, **устла́ть пол** иҙәнде йәйеп сығыу; 4) *эште, хәрәкәтте тейешле нәтижәгә еткереүҙе, мәҫ.*, **убаю́кать** бәүетеп йоҡлатыу; **уговори́ть** әүрәтеү, күндереү; 5) *эш-хәрәкәттең, ҡаршылыҡтарға ҡарамаҫтан, үтәлеүен, еңеп сығыуҙы, мәҫ.*, **убере́чь** һаҡлап алып ҡалыу; **удержа́ть** тотоп алып ҡалыу; 6) *берәй нәмәнең эсенә тултырыуҙы, һыйҙырыуҙы, мәҫ.*, **умести́ть** урынлаштырыу; **уложи́ть** тәртипләп һалыу; **уписа́ть** ауыҙға тултырыу, һыпырып һалыу; 7) *берәй эш-хәрәкәттең һөҙөмтәһендә нәмәнең яңы сифат алыуын йәки көсәйеүен, мәҫ.*, **удорожи́ть** ҡыйбатландырыу **2.** *ҡайһы бер ҡылымдарҙан тамамланған төр яһай, мәҫ.*, **ужа́лить** сағыу; **укра́сть** урлап китеү; **умертви́ть** үлтереп ташлау

**УА́** *межд.* (*употребляется для обозначения крика грудного ребёнка*) үүә, эңә; **ребёнок на́чал крича́ть: уа-уа!** бала “үүә-үүә” тип ҡысҡыра башланы

**УБА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* (*уменьшить по величине, количеству*) кәметеү, аҙайтыу, әҙәйтеү; (*уменьшить по степени, силе*) кимәлен (дәрәжәһен) түбәнерәк итеү, төшөрөү; (*по ширине, длине — об одежде*) тарайтыу, ҡыҫҡартыу, кесерәйтеү, кәметеү; **уба́вить ско́рость** тиҙлекте кәметеү; **уба́вить расхо́ды** сығымдарҙы аҙайтыу; **уба́вить це́ны** хаҡтарҙы кәметеү; **уба́вить в швах** йөйҙәренән тарайтыу, кесерәйтеү; **уба́вить рукава́** еңдәрен ҡыҫҡартыу **2.** (*обычно в сочетании со словами “в весе”*) ябығыу, һурылыу, һурығыу; **уба́вить в ве́се** ауырлығы кәмеү

**УБА́ВИТЬСЯ** *сов.* (*стать меньше по количеству, величине*) әҙәйеү, аҙайыу, кәмеү; (*по длине, ширине*) ҡыҫҡарыу; (*по силе*) кәрһеҙләнеү, кәрһеҙгә әйләнеү, кәрһеҙләнеп ҡалыу; **люде́й в до́ме уба́вилось** өйҙә кеше аҙайҙы; **си́лы у отца́ уба́вились** атайым кәрһеҙләнеп ҡалды

**УБАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **уба́вить**

**УБАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уба́виться**; **дни ста́ли убавля́ться** көндәр ҡыҫҡара башланы **2.** *страд. от* **убавля́ть**

**УБАЮ́КАТЬ** *сов.* **1.** *кого* (*ребёнка*) бәүетеү, бәүетеп йоҡлатыу, бәү-бәү итеү; **убаю́кать ребёнка** бәпәйҙе бәүетеп йоҡлатыу **2.** *кого* (*нагнать дремоту*) ойотоу, йоҡомһоратыу, йоҡо килтереү **3.** *кого-что*; *перен.* (*успокоить*) әүрәтеү, йыуатыу, алдаштырыу; (*о чувствах*) тынысландырыу, кәметеү, йомшартыу, баҫыу; **убаю́кать чу́вство бди́тельности** һиҙгерлек тойғоһон баҫыу

**УБАЮ́КАТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о ребёнке*) (бәүелеп) йоҡлап китеү **2.** (*погрузиться в сон*) ойоу, йоҡомһорау

**УБАЮ́КИВАНИЕ** *с см.* **убаю́кивать**

**УБАЮ́КИВАТЬ** *несов. см.* **убаю́кать**

**УБАЮ́КИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **убаю́каться** **2.** *страд. от* **убаю́кивать**

**УБЕГА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **убежа́ть** **2.** (*быстро удаляться, перемещаться*) ағылыу, күсеү; **ту́чи убега́ют за горизо́нт** болоттар офоҡ артына ағыла **3.** (*тянуться*) һуҙылыу; **доро́га убега́ет к ле́су** юл урманға ҡарай һуҙыла

**УБЕ́ГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*устать от беготни*) йүгерә-йүгерә хәлдән тайыу

**УБЕДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** ышандырырлыҡ (ышанырлыҡ, ышаныслы) булыу, нигеҙлелек, нигеҙле булыу; **убеди́тельность до́водов** дәлилдәрҙең ышандырырлыҡ булыуы **2.** ныҡышмалылыҡ

**УБЕДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ышандырырлыҡ, ышаныслы, ышандыра торған, инандырырлыҡ, нигеҙле; **убеди́тельные фа́кты** ышандырырлыҡ факттар; **убеди́тельный отве́т** ышандырырлыҡ яуап **2.** (*настоятельный*) ныҡышмалы, бик ныҡ; **убеди́тельная про́сьба** ныҡышмалы үтенес

**УБЕДИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *в чём* (*заставить поверить чему-л.*) ышандырыу, инандырыу; **убеди́ть това́рища в свое́й правоте́** иптәшеңде үҙеңдең хаҡлығыңа ышандырыу **2.** *с неопр.* (*заставить сделать что-л.*) күндереү, ыҡҡа килтереү, ыңғайлатыу, ризалатыу; **убеди́ть бра́та полечи́ться** ағайыңды дауаланып алырға күндереү

**УБЕДИ́ТЬСЯ** *сов. в чём* **1.** (*поверить во что-л.*) ышаныу, инаныу; **убеди́ться в и́скренности дру́га** дуҫыңдың ихласлығына инаныу **2.** (*удостовериться в чём-л.*) -ын/-ен күреү (аңлау), ышанып етеү, тамам ышаныу, шик тотмау, шикләнмәү; **убеди́ться, что его́ нет** уның юҡлығын аңлау

**УБЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** йүгереү, йүгереп китеү; **де́ти убежа́ли на ре́чку** балалар йылғаға йүгерҙе **2.** (*уйти тайком*) ҡасыу, һыпыртыу, ҡасып китеү, сығып ҡасыу; **кро́лик убежа́л из кле́тки** йорт ҡуяны ситлектән сығып ҡасҡан **3.** *разг.* ташыу, ташып китеү; **молоко́ убежа́ло** һөт ташып киткән

**УБЕЖДА́ТЬ** *несов. см.* **убеди́ть**

**УБЕЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **убеди́ться 2.** *страд. от* **убежда́ть** 1

**УБЕЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **убеди́ть — убежда́ть** 1, **убеди́ться — убежда́ться 2.** ныҡлы фекер; **всели́ть убежде́ние** ныҡлы фекер тыуҙырыу **3.** *мн.* **убежде́ния** ҡараш, фекер; **отста́ивать свои́ убежде́ния** үҙ ҡарашыңды яҡлау; **полити́ческие убежде́ния** сәйәси ҡараштар

**УБЕЖДЁННОСТЬ** *ж* **1.** ышанғанлыҡ, инанғанлыҡ, ышанған (инанған) булыу; **убеждённость в свои́х взгля́дах** үҙ ҡараштарыңа инанғанлыҡ **2.** ышанғанлыҡ, тоғролоҡ, тайпылмаҫлыҡ

**УБЕЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **убеди́ть 2.** *прил.* (*твёрдо уверенный в чём-л.*) инанған, ышанған **3.** *прил.* (*твёрдый в своих убеждениях*) ышаныслы, ныҡлы ҡарашлы, тоғро, тайпылмаҫ; **убеждённый атеи́ст** тайпылмаҫ дәһри

**УБЕ́ЖИЩЕ** *с* **1.** ышыҡ ер (урын), төлөк; **найти́ убе́жище от дождя́** ямғырҙан ышыҡ урын табыу **2.** *спец.* нығытма, убежище; **укры́ться в убе́жище** нығытмаға йәшеренеү **3.** *юр.* һыйыныу; **найти́ убе́жище в нейтра́льной стране́** нейтраль илдә һыйыныу табыу; **пра́во убе́жища** һыйыныу хоҡуғы

**УБЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* ағартыу, ағартып сығыу, аҡҡа әйләндереү

**УБЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **убели́ть**

**УБЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **убеля́ть**

**УБЕРЕГА́ТЬ** *несов. см.* **убере́чь**

**УБЕРЕГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **убере́чься 2.** *страд. от* **уберега́ть**

**УБЕРЕ́ЧЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡурсалау, ҡурсалап (алып) ҡалыу; **убере́чь жеребёнка от волко́в** ҡолонсаҡты бүреләрҙән ҡурсалап алып ҡалыу **2.** *от чего* һаҡлап (алып) ҡалыу; **убере́чь люде́й от эпиде́мии** кешеләрҙе эпидемиянан һаҡлап алып ҡалыу

**УБЕРЕ́ЧЬСЯ** *сов.* һаҡланыу, һаҡланып ҡалыу; **убере́чься от просту́ды** һалҡын тейеүҙән һаҡланып ҡалыу

**УБИВА́ТЬ** *несов. см.* **уби́ть**

**УБИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уби́ться 2.** *о ком-чём, по кому-чему* и *без доп.*; *разг.* (*сильно горевать*) янып көйөү, өҙгөләнеү, өҙәләнеү; **убива́ться по сы́ну** улы өсөн янып көйөү **3.** *разг.* көсәнеү, көс һалыу (түгеү), үлә яҙыу; **убива́ться ра́ди де́нег** аҡса өсөн көсәнеү **4.** *страд. от* **убива́ть**

**УБИ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*смертоносный*) үлемесле, һәләкәтле; **уби́йственный ого́нь** һәләкәтле ут **2.** *перен.*, *разг.* аяуһыҙ, тетрәткес; **уби́йственная кри́тика** аяуһыҙ тәнҡит; **уби́йственное изве́стие** тетрәткес хәбәр **3.** *перен.*, *разг.* (*невыносимо плохой*) үтә (иҫ киткес) насар, ҡот осҡос; **уби́йственная пого́да** үтә насар һауа торошо

**УБИ́ЙСТВО** *с см.* **уби́ть — убива́ть** 1; **полити́ческое уби́йство** сәйәси маҡсаттан үлтереү; **умы́шленное уби́йство** уҫал (яуыз) ниәт менән үлтереү; **де́ло об уби́йстве** үлтереү тураһындағы эш

**УБИ́ЙЦА** *м* и *ж* ҡатил, кеше үлтереүсе

**УБИРА́ТЬ** *несов. см.* **убра́ть**

**УБИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **убра́ться 2.** *страд. от* **убира́ть**

**УБИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уби́ть 2.** *в знач. сущ.* **уби́тый** *м* и **уби́тая** *ж* үлтерелгән кеше, үлек; **спи́сок уби́тых** үлтерелгәндәрҙең исемлеге **3.** *прил.* (*подавленный*) ҡайғыға батҡан, ҡайғы баҫҡан, (ауыр) ҡайғылы; **уби́тый го́рем челове́к** ҡайғыға батҡан кеше ♦ **молча́ть как уби́тый** өнһөҙ-һүҙһеҙ тороу; **спать как уби́тый** ҡаты (үлек кеүек) йоҡлау

**УБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* үлтереү **2.** *что*; *перен.* (*уничтожить*) юҡ итеү, юҡҡа сығарыу, өҙөү; **уби́ть наде́жду** өмөтөн өҙөү; **уби́ть спосо́бность к труду́** хеҙмәткә һәләтен юҡҡа сығарыу **3.** *кого-что* (*сильно расстроить*) ҡайғыға һалыу, аяҡтан йығыу; **мать была́ уби́та изве́стием о сы́не** улы тураһындағы хәбәр әсәне аяҡтан йыҡты **4.** *что*; *перен.*, *разг.* (*истратить*) әрәм (исраф) итеү; (*о силах*) түгеү; (*о деньгах*) туҙҙырыу; **уби́ть вре́мя** ваҡытты әрәм итеү; **уби́ть си́лы на бесполе́зное де́ло** файҙаһыҙ эшкә көс түгеү ♦ **уби́ть двух за́йцев** ике кәмә ҡойроғон тотоу; **(хоть) убе́й** кәрәк үлтер, үлтерһәң дә (*бер нәмә лә эшләп булмай*)

**УБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*разбиться насмерть*) имгәнеп (ауып) үлеү **2.** *прост.* (*ушибиться*) имгәнеү

**УБЛАЖА́ТЬ** *несов. см.* **ублажи́ть**

**УБЛАЖИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* күңелен күреү (табыу), күңеленә ярау; **ублажи́ть ба́бушку** өләсәйҙең күңелен күреү

**УБЛЮ́ДОК** *м* **1.** *прост.*, *уст.* (*помесь — о животных*) ҡушылдыҡ **2.** *перен.*, *бран.* әҙәм аҡтығы

**УБО́ГИЙ,** -ая, -ое **1.** *в знач. сущ.* **убо́гий** *м* и **убо́гая** *ж* зәғиф, ғәрип **2.** (*очень бедный*) ярлы, фәҡир, меҫкен; **убо́гое жильё** ярлы торлаҡ; **убо́гая оде́жда** меҫкен кейем **3.** *перен.* (*невыразительный*) ярлы, һай, төҫһөҙ, самалы, ҡойто; **убо́гая мысль** ярлы фекер

**УБО́ГОСТЬ** *ж* **1.** (*бедность*) ярлылыҡ, фәҡирлек, меҫкенлек, аламалыҡ; **убо́гость жилья́** торлаҡтың ярлылығы; **убо́гость оде́жды** кейемдең аламалығы **2.** *перен.* ярлылыҡ, төҫһөҙлөк, сикләнгәнлек

**УБО́ЖЕСТВО** *с* **1.** ғәриплек, зәғифлек; **убо́жество те́ла** тәндең ғәриплеге **2.** *см.* **убо́гость**

**УБО́Й** *м*; *спец.* һуғым, һуйыу, салыу; **корми́ть на убо́й** һуғымға һимертеү ♦ **(как) на убо́й корми́ть (пои́ть)** ныҡ ашатыу (эсереү); **посыла́ть на убо́й** үлемгә ебәреү

**УБО́ЙНОСТЬ** *ж*; *воен.* үлтереү (ҡырыу, һәләк итеү) көсө; **убо́йность ружья́** мылтыҡтың үлтереү көсө

**УБО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* **1.** һуғым ...ы; **убо́йный скот** һуғым малы **2.** үлтереү (һәләк итеү, ҡырыу) ...ы, үлтергес, һәләк иткес; **убо́йная си́ла ору́дия** туптың үлтереү көсө

**УБО́Р** *м*; *уст.* **1.** кейем; **сва́дебный убо́р** туй кейеме; **ра́тный убо́р** яу кейеме **2.** биҙәү әйбере; **убо́р на волоса́х** сәстәге биҙәү әйбере ♦ **головно́й убо́р** баш кейеме

**УБО́РИСТОСТЬ** *ж* тығыҙлыҡ, ыҡсымлыҡ; **убо́ристость по́черка** яҙыуҙың тығыҙлығы

**УБО́РИСТЫЙ,** -ая, -ое (*о почерке, печатном тексте*) тығыҙ, йыш, ыҡсым; **убо́ристый по́черк** ыҡсым яҙыу

**УБО́РКА** *ж см.* **убра́ть — убира́ть** 1, 3, 5; **убо́рка помеще́ния** бүлмәне йыйыштырыу; **убо́рка урожа́я** уңышты урып-йыйыу; **разде́льная убо́рка** айырым урып-йыйыу

**УБО́РНАЯ** *ж* **1.** *театр.* (актёрҙың) кейенеү-яһаныу бүлмәһе **2.** бәҙрәф, әбрәкәй

**УБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** урып-йыйыу ...ы, йыйыу; **убо́рочная кампа́ния** урып-йыйыу кампанияһы; **убо́рочные маши́ны** йыйыу машиналары **2.** *в знач. сущ.* **убо́рочная** *ж*; *разг.* урып-йыйыу (ваҡыты)

**УБО́РЩИК** *м* **1.** йыйыштырыусы **2.** йыйыштырыу машинаһы

**УБО́РЩИЦА** *ж* йыйыштырыусы

**УБРА́НСТВО** *с* **1.** йыһаз, йорт йыһазы, биҙәү әйберҙәре; **убра́нство ко́мнат** бүлмәләр йыһазы **2.** (*наряд, одежда*) кейем-һалым, кейем; (*специальное снаряжение коня*) егеү; **официа́льное убра́нство** рәсми кейем; **убра́нство коня́** ат егеүе

**УБРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*унести, удалить*) алыу, алып ҡуйыу, йыйыу, йыйып ҡуйыу (алыу); **убра́ть ли́шние ве́щи из ко́мнаты** бүлмәләге артыҡ нәмәләрҙе алып ҡуйыу; **убра́ть кни́ги в шкаф** китаптарҙы шкафҡа йыйып ҡуйыу **2.** *кого-что* (*устранить, исключить, отстранить*) алыу, алып китеү (сығыу), алып ташлау, юҡ итеү; **убра́ть из те́кста цита́ты** текстан цитаталарҙы алып ташлау; **убра́ть ребёнка из шу́мной ко́мнаты** баланы шау-шыулы бүлмәнән алып китеү; **убра́ть заве́дующего** мөдирҙе алып ташлау **3.** *что* (*собрать, снять*) алыу, йыйып алыу, урып-йыйыу; **убра́ть зерновы́е** игенде йыйып алыу **4.** *что* (*поместить, спрятать*) алып (йыйып, йәшереп) ҡуйыу; **убра́ть лека́рства** дарыуҙарҙы йыйып ҡуйыу; **убра́ть де́ньги в комо́д** аҡсаны комодҡа йәшереп ҡуйыу **5.** *что* (*прибрать*) йыйыштырыу; **убра́ть ко́мнату** бүлмәне йыйыштырыу **6.** *кого* (*нарядить, одеть*) кейендереү, биҙәү; (*об умершем*) мәйетте йыуыу, кәфенләү; **убра́ть неве́сту в сва́дебный наря́д** кәләшкә туй кейеме кейҙереү

**УБРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** йыйыштырыу, йыйыштырыныу; **убра́ться в до́ме** өйҙө йыйыштырыу; **убра́ться к пра́зднику** байрамға йыйыштырыныу **2.** *с чем* йыйнап (йыйып, сабып, урып) алыу (алып бөтөрөү); **убра́ться с хлеба́ми** икмәкте йыйып алыу **3.** сығып китеү, китеп ҡалыу, ысҡыныу; **убра́ться подобру́-поздоро́ву** иҫән саҡта китеп ҡалыу

**УБЫВА́ТЬ** *несов. см.* **убы́ть**

**У́БЫЛЬ** *ж* **1.** кәмеү, аҙайыу; (*в размере, степени и т.п.*) ҡайтыу; (*об уровне воды*) тартылыу; **у́быль поголо́вья скота́** мал һанының кәмеүе; **вода́ пошла́ на у́быль** һыу ҡайта башланы **2.** (*убыток*) зарар, зыян, ҡаза; **возмести́ть у́быль** зыянды ҡаплау

**УБЫСТРИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* тиҙләтеү, йәһәтләтеү, ҡыҙыулатыу; **убыстри́ть проце́сс произво́дства** етештереү процесын тиҙләтеү; **убыстри́ть шаг** аҙымды ҡыҙыулатыу

**УБЫСТРИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тиҙләнеү, тиҙләнә төшөү, тиҙлеге артыу, ҡыҙыулана төшөү (барыу), йәһәтләү

**УБЫСТРЯ́ТЬ** *несов. см.* **убыстри́ть**

**УБЫСТРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **убыстри́ться** **2.** *страд. от* **убыстря́ть**

**УБЫ́ТОК** *м* ҡаза, зарар, зыян; **нести́ убы́ток** зыян күреү; **возмести́ть убы́ток** зыянды ҡаплау

**УБЫ́ТОЧНОСТЬ** *ж* зарар(лы)лыҡ, зыян(лы)лыҡ, файҙаһыҙлыҡ, зарарлы (зыянлы) булыу; **убы́точность торго́вли** сауҙаның зыянлылығы

**УБЫ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое зарарлы, зыянлы, файҙаһыҙ; **убы́точное предприя́тие** файҙаһыҙ предприятие

**УБЫ́ТЬ** *сов.* **1.** кәмеү, аҙайыу, ҡайтыу; (*об уровне воды*) тартылыу; **си́лы у́были** көстәр кәмене; **вода́ убыла́** һыу ҡайтҡан **2.** *офиц.* (*выбыть*) китеү, сығыу; **убы́ть в о́тпуск** ялға китеү;

**убы́ть из кома́нды** команданан сығыу ♦ **не убу́дет** *кого*; *прост.* бер нәмә лә булмаҫ, бер ере лә кәмемәҫ

**УВАЖА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уважа́ть 2.** *прил.* хөрмәтле, хөрмәткә (ихтирамға) лайыҡ, хөрмәт (ихтирам) ителгән, арҙаҡлы, мөхтәрәм; **собра́ть уважа́емых люде́й** хөрмәтле кешеләрҙе йыйыу

**УВАЖА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** хөрмәт итеү, хөрмәтләү, ихтирам итеү, ихтирамлау, ололау; **уважа́ть же́нщин** ҡатын-ҡыҙҙы ихтирамлау **2.** (*считаться с кем-чем-л.*) һанлау, ихтирам итеү; **уважа́ть чужо́й труд** кеше хеҙмәтен ихтирам итеү; **уважа́ть чу́вства люде́й** кешеләрҙең тойғоларын ихтирам итеү

**УВАЖЕ́НИЕ** *с* хөрмәт, ихтирам, хөрмәт (ихтирам) итеү, ҡәҙер-хөрмәт; **уваже́ние прав челове́ка** кеше хоҡуҡтарын ихтирам итеү; **досто́йный уваже́ния** хөрмәткә лайыҡ; **завоева́ть всео́бщее уваже́ние** бөтәһенең ихтирамын яулау; **заслужи́ть уваже́ние** ихтирамға ирешеү

**УВАЖИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ихтирам(лылыҡ), хөрмәт(лелек), хөрмәт (ихтирам) итеү; **ока́зывать осо́бую уважи́тельность** айырым хөрмәт күрһәтеү

**УВАЖИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иғтибарға алырлыҡ, аҡларлыҡ, кисерерлек, ғәфү итерлек, нигеҙле; **уважи́тельная причи́на** кисерерлек сәбәп **2.** ихтирамлы, ихтирамға (хөрмәткә) лайыҡ; **уважи́тельное отноше́ние** ихтирамлы мөнәсәбәт; **уважи́тельный челове́к** хөрмәткә лайыҡ кеше

**УВА́ЖИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* иғтибарға алыу, үтәү, кире ҡаҡмау; **ува́жить его́ про́сьбу** һорауын кире ҡаҡмау, үтәү **2.** *кого-что* күңелен күреү, ололау, хөрмәт (ихтирам) күрһәтеү; **ува́жить старика́** ҡартҡа хөрмәт күрһәтеү

**УВА́Л** *м* арҡа, ҡырла

**У́ВАЛЕНЬ** *м*; *разг.* ауыр кәүҙәле (ауыр һөйәкле, нәкәҫ, һүлпән) кеше

**УВА́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** тигеҙһеҙ, үрле-ҡырлы; **ува́листая доли́на** үрле-ҡырлы үҙән **2.** *прост.* ауыш, аушан, алпан-толпан; **ува́листая похо́дка** алпан-толпан атлау

**УВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **навари́ть**

**УВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **увари́ться 2.** *страд. от* **ува́ривать**

**УВАРИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** бешереп еткереү, еткерә бешереү; **увари́ть мя́со** итте бешереп еткереү **2.** ҡайнатып кәметеү; **увари́ть бульо́н** һурпаны ҡайнатып кәметеү

**УВАРИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** бешеп етеү; **мя́со не увари́лось** ит бешеп етмәгән **2.** ҡайнап кәмеү; **бульо́н наполови́ну увари́лся** һурпа ҡайнап яртылаш кәмегән

**УВЕДОМИ́ТЕЛЬ** *м* и **УВЕДОМИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* белдереүсе, хәбәр итеүсе

**УВЕДОМИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое белдереү ...ы, белдерә торған, хәбәр итеү ...ы, хәбәр итә торған; **уведоми́тельная бума́га** белдереү ҡағыҙы

**УВЕ́ДОМИТЬ** *сов. кого-что* белдереү, хәбәр итеү; **уве́домить о дне заседа́ния** ултырыш көнө тураһында хәбәр итеү

**УВЕДОМЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **уве́домить — уведомля́ть 2.** (*документ*) белдереү ҡағыҙы; **получи́ть уведомле́ние** белдереү ҡағыҙы алыу

**УВЕДОМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **уве́домить**

**УВЕДОМЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **уведомля́ть**

**УВЕЗТИ́** *сов. кого-что* **1.** (*уезжая, взять с собой*) алып китеү; **увезти́ дете́й в дере́вню** балаларҙы ауылға алып китеү **2.** (*похитить*) йәшерен (урлап) алып китеү; **тайко́м увезти́ неве́сту** ҡыҙҙы урлап алып китеү

**УВЕКОВЕ́ЧЕНИЕ** *с см.* **увекове́чить**

**УВЕКОВЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **увекове́чить**

**УВЕКОВЕ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **увекове́читься 2.** *страд. от* **увекове́чивать**

**УВЕКОВЕ́ЧИТЬ** *сов. кого-что* мәңгеләштереү, мәңгегә ҡалдырыу, мәңгелеккә һаҡлау; **увекове́чить па́мять па́вших на войне́** һуғышта һәләк булғандарҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү

**УВЕКОВЕ́ЧИТЬСЯ** *сов.* мәңгеләшеү, мәңгегә (ғүмерлеккә) ҡалыу, мәңгегә иҫтәлек булып ҡалыу

**УВЕЛИЧЕ́НИЕ** *с см.* **увели́чить, увели́читься**

**УВЕЛИ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **увели́чить**

**УВЕЛИ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **увели́читься 2.** *страд. от* **увели́чивать**

**УВЕЛИЧИ́ТЕЛЬ** *м см.* **фотоувеличи́тель**

**УВЕЛИЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҙурайтып күрһәтә торған, ҙурайта торған, ҙурайтҡыс; **увеличи́тельное стекло́** ҙурайтҡыс быяла **2.** *лингв.* артыҡлыҡ ...ы; **увеличи́тельные су́ффиксы** артыҡлыҡ суффикстары

**УВЕЛИ́ЧИТЬ** *сов. что* арттырыу; (*по величине, объёму*) ҙурайтыу, киңәйтеү; (*по степени, силе, интенсивности*) көсәйтеү; **увели́чить портре́т** портретты ҙурайтыу; **увели́чить звук** тауышты көсәйтеү

**УВЕЛИ́ЧИТЬСЯ** *сов.* **1.** артыу, күбәйеү, ишәйеү; **число́ жи́телей го́рода увели́чилось** ҡала халҡының һаны артты **2.** киңәйеү, ҙурайыу; **потре́бность в жилы́х площадя́х увели́чилась** торлаҡ майҙанына ихтыяж ҙурайҙы **3.** (*усилиться*) көсәйеү, артыу; **увели́чилась опа́сность затопле́ния** һыу баҫыу ҡурҡынысы артты

**УВЕНЧА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* венок кейҙереү; **увенча́ть победи́теля** еңеүсегә венок кейҙереү **2.** *что, чем* (*закончить верхнюю часть чего-л.*) ослау, ослап ҡуйыу; **зда́ние увенча́ла ба́шня** бинаны манара ослап ҡуйған **3.** *перен.* (*успешно завершить*) уңышлы тамамлау, ослау ♦ **увенча́ть сла́вой** данға күмеү, данлау

**УВЕНЧА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *трад.-поэт.* венок кейеү **2.** *чем* (*успешно завершиться*) уңышлы тамамланыу (бөтөү); **наступле́ние войск увенча́лось побе́дой** ғәскәрҙең һөжүме еңеү менән тамамланды

**УВЕ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **увенча́ть**

**УВЕ́НЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **увенча́ться** **2.** *страд. от* **уве́нчивать**

**УВЕРЕ́НИЕ** *с* инандырыу, ышандырыу; **увере́ния в дру́жбе** дуҫлыҡта ышандырыу

**УВЕ́РЕННОСТЬ** *ж* **1.** ышанғанлыҡ, ышаныс, ышаныу тойғоһо, ышаныслылыҡ; **уве́ренность в чу́вствах ма́тери** әсә тойғоларына ышаныс **2.** ышанғанлыҡ; **уве́ренность в себе́** үҙеңә ышанғанлыҡ

**УВЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уве́рить** **2.** *прил.* ышаныслы, ныҡ ышанған, ныҡлы; **уве́ренный шаг** ышаныслы аҙым; **уве́ренный го́лос** ныҡлы тауыш; **уве́ренный отве́т** ышаныслы яуап **3.** *прил.* (*убеждённый в ком-чём-л.*) ныҡ ышанған, ышаныулы, инаныулы; **уве́ренный в бу́дущем челове́к** киләсәгенә ныҡ ышанған кеше ♦ **бу́дь(те) уве́рен(ы)!** ышан(ығыҙ)!, шиклән(мәгеҙ)!

**УВЕ́РИТЬ** *сов. кого-что* ышандырыу, инандырыу, ышаныс уятыу; **уве́рить в свое́й правоте́** үҙеңдең хаҡлы булыуыңа ышандырыу

**УВЕ́РИТЬСЯ** *сов.* ышаныу, инаныу, шик тотмау; **уве́риться в пре́данности дру́га** дуҫыңдың тоғролоғона инаныу

**УВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов. от кого-чего* и *без доп.* **1.** ялтаныу, тайпылыу, ситкә тайпылып ҡалыу, тайшаныу; **уверну́ться от уда́ра** һуғыуҙан ялтаныу **2.** *перен.*, *разг.* ҡасып ситләшеү, ялтарыу, ҡасыу; **уверну́ться от прямо́го отве́та** тура яуаптан ҡасыу

**УВЕ́РОВАТЬ** *сов. во что*; *книжн.* ышаныу, инаныу; **уве́ровать в и́скренность** *чью-л. кемдеңдер* ихласлығына инаныу

**УВЁРТКА** *ж* хәйлә, әмәл, ялған сәбәп; **ло́вкая увёртка** оҫта хәйлә

**УВЁРТЛИВОСТЬ** *ж* **1.** (*ловкость*) етеҙлек, йылғырлыҡ, сослоҡ, шымтағайлыҡ, йышылғанлыҡ **2.** *перен.* (*хитрость*) хәйләлек, хәйләкәрлек, мут(лы)лыҡ

**УВЁРТЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*ловкий, подвижный*) етеҙ, йылғыр, сос **2.** *перен.* хәйләкәр, хәйләле, мут; **увёртливый отве́т** хәйләле яуап

**УВЁРТЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **уверну́ться**

**УВЕРТЮ́РА** *ж*; *муз.* увертюра (**1.** *операға, опереттаға, балетҡа һ.б. инеш өлөшө* **2.** *оркестр өсөн соната формаһында яҙылған әҫәр*)

**УВЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **уве́рить**

**УВЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уве́риться** **2.** *страд. от* **уверя́ть**

**УВЕСЕЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **увеселя́ть** **2.** *обычно мн.* **увеселе́ния** күңел асыу, уйын-көлкө, кәйеф-сафа ҡороу, тамаша; **ма́ссовые увеселе́ния** күмәк күңел асыуҙар

**УВЕСЕЛИ́ТЕЛЬ** *м* күңел асыусы, мәрәкәсе, мәҙәксе, шырмый

**УВЕСЕЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күңел асыу ...ы, күңелле, уйын-көлкөлө; **увесели́тельные заведе́ния** күңел асыу йорттары

**УВЕСЕЛЯ́ТЬ** *несов. кого-что* күңелен асыу, уйын-көлкө (кәйеф-сафа) ҡороу, мәрәкә һөйләү; **увеселя́ть госте́й анекдо́тами** көләмәстәр менән ҡунаҡтарҙың күңелен асыу

**УВЕ́СИСТОСТЬ** *ж*; *прям.*, *перен.* һәлмәклек, ауырлыҡ, тослоҡ; **уве́систость ручно́й кла́ди** ҡул йөгөнөң һәлмәклеге; **уве́систость уда́ра** һуғыуҙың тослоғо

**УВЕ́СИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** һәлмәк, ауыр, тос; **уве́систый чемода́н** һәлмәк сумаҙан **2.** *перен.*, *разг.* (*сильный*) ауыр, тос, һәлмәк, ҡаты; **уве́систый уда́р** ҡаты һуғыу

**УВЕСТИ́** *сов. кого-что* **1.** алып китеү (ҡайтыу); **увести́ аресто́ванного** тотҡондо алып китеү **2.** (*украсть, ведя или угоняя*) урлап (ирекһеҙләп) алып китеү; **увести́ ло́шадь** атты урлап алып китеү

**УВЕ́ЧИТЬ** *несов. кого-что* имгәтеү, зәғифләү, ғәрипләндереү; **уве́чить но́гу** аяҡты зәғифләү

**УВЕ́ЧИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*калечиться*) имгәнеү, зәғифләнеү, ғәрипләнеү **2.** *страд. от* **уве́чить**

**УВЕ́ЧЬЕ** *с* ғәриплек, зәғифлек, имгәнеү

**УВЕ́ШАТЬ** *сов. кого-что, чем* элеп (тағып, аҫып) бөтөрөү (тултырыу); **уве́шать сте́ну карти́нками** стенаға һүрәттәр элеп бөтөрөү

**УВЕ́ШАТЬСЯ** *сов. чем*; *разг.* тағып (аҫып) алыу, тағыныу; **уве́шаться фотоаппара́тами** фотоаппараттар тағып алыу

**УВЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **уве́шать**

**УВЕ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уве́шаться** **2.** *страд. от* **уве́шивать**

**УВЕЩА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **увеща́ть** **2.** (*наставление*) өгөт, өгөт-нәсихәт, дим; **прислу́шиваться к увеща́ниям** өгөткә ҡолаҡ һалыу

**УВЕЩА́ТЬ** *несов. кого-что* өгөтләү, өгөт-нәсихәт биреү, өгөтләп ыңғайлатыу (ризалатыу), күндереү; **увеща́ть сы́на** улды өгөтләү

**УВЕЩЕВА́НИЕ** *с см.* **увещева́ть**

**УВЕЩЕВА́ТЬ** *несов. см.* **увеща́ть**

**УВИВА́ТЬ** *несов. см.* **уви́ть**

**УВИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уви́ться** **2.** *за кем* и *без доп.*; *разг.* (*вертеться возле кого-чего-л.*) сыуалыу, уралыу, ураланыу, сыбаланып (бөтөрөлөп, буталып, уралып) йөрөү; **увива́ться о́коло ма́тери** әсәһе янында сыуалыу **3.** *страд. от* **увива́ть**

**УВИДА́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **уви́деть**

**УВИДА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **уви́деться**

**УВИ́ДЕТЬ** *сов. кого-что* **1.** күреү, күреп ҡалыу; **уви́деть това́рища на вокза́ле** вокзалда иптәште күреү **2.** (*осознать, понять*) күреү, аңлау, төшөнөү; **уви́деть, что прав** үҙеңдең хаҡлығыңа төшөнөү ♦ **уви́деть свет** донъя күреү; **поживём — уви́дим** иҫән-һау булһаҡ, күрербеҙ

**УВИ́ДЕТЬСЯ** *сов. с кем* и *без доп.* күрешеү, осрашыу; **уви́деться с однoку́рсниками** курсташтар менән осрашыу

**УВИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **увильну́ть**

**УВИЛЬНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** ялтаныу, тайпылыу, тайшаныу, ялтанып (тайпылып) ҡалыу; **увильну́ть от столкнове́ния** бәрелеүҙән ялтаныу **2.** *от чего*; *перен.* ялтарыу, тайшаныу, ҡасыу; **увильну́ть от отве́тственности** яуаплылыҡтан ҡасыу; **увильну́ть от рабо́ты** эштән ялтарыу

**УВИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ураү, урап бөтөү (ҡуйыу), сырмау, сырмап бөтөү, үреү, үреп ҡуйыу; **уви́ть го́лову цвета́ми** башҡа сәскәләр үреп ҡуйыу

**УВИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*о растительности*) сырмалыу, үрелеү, уралыу, сырмап (урап) алыу

**УВЛАЖНЕ́НИЕ** *с см.* **увлажни́ть** — **увлажня́ть**, **увлажни́ться** — **увлажня́ться**

**УВЛАЖНИ́ТЕЛЬ** *м*; *спец.* дымландырғыс, дымлатҡыс; **увлажни́тель во́здуха** һауаны дымлатҡыс

**УВЛАЖНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое дымлатҡыс ...ы, дымландырыу ...ы; **увлажни́тельная устано́вка** дымлатҡыс ҡоролма

**УВЛАЖНИ́ТЬ** *сов. что* дымландырыу, дымландырып алыу, еүешләндереү, еүешләү, һыулау; **увлажни́ть во́здух** һауаны дымландырыу

**УВЛАЖНИ́ТЬСЯ** *сов.* дымланыу, дымланып китеү, еүешләнеү, еүешләнеп китеү, һыуланыу; **глаза́ её увлажни́лись** уның күҙҙәре дымланды

**УВЛАЖНЯ́ТЬ** *несов. см.* **увлажни́ть**

**УВЛАЖНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **увлажни́ться** **2.** *страд. от* **увлажня́ть**

**УВЛЕКА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ҡыҙыҡлыҡ, мауыҡтырғыс (әүрәткес, ҡыҙыҡлы) булыу; **увлека́тельность кни́ги** китаптың мауыҡтырғыс булыуы

**УВЛЕКА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡтырғыс, әүрәткес, ҡыҙыҡлы; **увлека́тельный рома́н** мауыҡтырғыс роман; **увлека́тельная экску́рсия** ҡыҙыҡлы экскурсия

**УВЛЕКА́ТЬ** *несов. см.* **увле́чь**

**УВЛЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **увле́чься** **2.** *страд. от* **увлека́ть**

**УВЛЕКА́ЮЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся **1.** *прич. от* **увлека́ться** **2.** *прил.* мауығыусан, ҡыҙығыусан, (ихлас) ҡыҙыҡһыныусан; **увлека́ющийся челове́к** мауығыусан кеше **3.** *прил.* (*легко влюбляющийся*) бик тиҙ ғашиҡ булыусан, мауығыусан; **увлека́ющийся ю́ноша** мауығыусан үҫмер

**УВЛЕЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **увле́чь** 1; **2.** (*воодушевление, пыл*) дәрт, ялҡын, мауығыу дәрте (ялҡыны) **3.** *кем-чем* күңел һалыу, мауығыу, бирелеү; **увлече́ние альпини́змом** альпинизм менән мауығыу **4.** (*влюблённость*) күңел (күҙ) төшөү, яратыу, ғашиҡ булыу; **взаи́мное увлече́ние** бербереһенә күңел төшөү

**УВЛЕЧЁННОСТЬ** *ж* мауығыусанлыҡ, бирелгәнлек, күңел һалыусанлыҡ; **увлечённость рабо́той** эшкә бирелгәнлек

**УВЛЕЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **увле́чь** **2.** *прил.* мауыҡҡан, дәртләнгән; **увлечённые ученики́** мауыҡҡан уҡыусылар

**УВЛЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *кого-что* эйәртеп алып китеү; **увле́чь на охо́ту** һунарға эйәртеп алып китеү **2.** күңелен биләү, мауыҡтырыу, ылыҡтырыу; **чте́ние увлекло́ его́ по́лностью** уҡыу уның күңелен тотош биләне **3.** *кого-что* арбау, һоҡландырыу; **игра́ актёра увлекла́ зри́телей** актёрҙың уйыны тамашасыларҙы арбаны **4.** *кого-что*; *перен.* (*влюбить в себя*) күңелен арбау, яраттырыу, үҙенә ҡаратыу

**УВЛЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** *кем-чем* мауығыу, бирелеү, әүрәү, күңел һалыу; **увле́чься класси́ческой литерату́рой** классик әҙәбиәт менән мауығыу **2.** *кем* (*влюбиться*) күңел (күҙ) төшөү, яратыу, мауығыу, ғашиҡ булыу

**УВО́Д** *м* **1.** *см.* **увести́** — **уводи́ть** **2.** *тех.* тайпылыу, күсеү; **уво́д сверла́** быраүҙың тайпылыуы

**УВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **увести́**

**УВОДИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **уводи́ть**

**УВОЗИ́ТЬ** *несов. см.* **увезти́**

**УВОЛА́КИВАТЬ** *несов. см.* **уволо́чь**

**УВОЛА́КИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уволо́чься** **2.** *страд. от* **увола́кивать**

**УВО́ЛИТЬ** *сов. кого-что* **1.** эштән ебәреү (бушатыу); (*временно отпустить из расположения части и т.п.*) сығарыу; **уво́лить по сокраще́нию шта́тов** штатты ҡыҫҡартыу сәбәпле эштән бушатыу; **уво́лить курса́нта в го́род** курсантты ҡалаға сығарыу **2.** *повел.* **уво́ль(те)** ҡотҡар(ығыҙ), бушат(ығыҙ)

**УВО́ЛИТЬСЯ** *сов.* эштән китеү; (*получить временное освобождение от чего-л.*) сығыу; **уво́литься с рабо́ты** эштән китеү; **уво́литься в о́тпуск** отпускыға сығыу

**УВОЛО́ЧЬ** *сов.* **1.** *что*; *разг.* һөйрәп алып китеү; **щено́к уволо́к боти́нок** көсөк ботинканы һөйрәп алып киткән **2.** *прост.* көсләп алып сығыу; **уволо́чь вну́ка на у́лицу** ейәнде көсләп урамға алып сығыу **3.** *прост.* (*украсть*) урлап алып китеү, алып ҡасыу

**УВОЛО́ЧЬСЯ** *сов.*; *прост.* китеү, һөйрәлеп китеү (барыу), саҡ-саҡ ҡуҙғалыу

**УВОЛЬНЕ́НИЕ** *с см.* **уво́лить** 1 — **увольня́ть**; **написа́ть заявле́ние об увольне́нии** эштән китеү тураһында ғариза яҙыу

**УВОЛЬНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сығарыу ...ы, ялға (ирекккә) сығарыу ...ы; **увольни́тельная запи́ска** ирекккә сығарыу ҡағыҙы **2.** *в знач. сущ.* **увольни́тельная** *ж*; *воен.* увольнительный, (*ирекккә (ялға) сығарыу ҡағыҙы*)

**УВОЛЬНЯ́ТЬ** *несов. см.* **уво́лить** 1

**УВОЛЬНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уво́литься** **2.** *страд. от* **увольня́ть**

**УВУЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* увуляр (*кесе тел һәм аңҡау ярҙамы менән әйтелә торған*); **увуля́рные согла́сные** увуляр тартынҡылар

**УВЫ́** *межд.* (*выражает сожаление*) ай, әй, эх, йәл

**УВЯДА́НИЕ** *с см.* **увяда́ть**; **увяда́ние приро́ды** тәбиғәттең шиңеүе

**УВЯДА́ТЬ** *несов. см.* **увя́нуть**

**УВЯ́ДШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **увя́нуть** **2.** *прил.*; *прям.*, *перен.* һулыған, шиңгән; **увя́дшая трава́** һулыған үлән; **увя́дшая красота́** һулыған матурлыҡ

**УВЯЗА́ТЬ I** *сов. что*; *разг.* **1.** (*упаковать*) төрнәү, төйнәү, урап бәйләп ҡуйыу, сырмап ҡуйыу **2.** *перен.* (*согласовать*) бәйләү, яраштырыу, тура килтереү; **увяза́ть тео́рию с пра́ктикой** теорияны практика менән бәйләү

**УВЯЗА́ТЬ II** *несов. см.* **увя́знуть**

**УВЯЗА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *прост.* (*упаковаться*) төйнәнеү, төрнәкләнеү **2.** *за кем, с кем*; *перен.*, *разг.* эйәреү, тағылыу, арттан ҡалмау; **за на́ми увяза́лась соба́ка** беҙҙең арттан эт эйәрҙе **3.** *с чем*; *перен.* ярашыу, тура килеү

**УВЯ́ЗКА** *ж см.* **увяза́ть** I — **увя́зывать**; **увя́зка двух вопро́сов** ике мәсьәләне яраштырыу

**УВЯ́ЗНУТЬ** *сов. в чём* **1.** батыу, батып китеү; **увя́знуть в боло́те** һаҙлыҡҡа батыу **2.** *перен.* батыу, сумыу; **увя́знуть в невесёлых мы́слях** күңелһеҙ уйҙарға батыу

**УВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **увяза́ть** I

**УВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **увяза́ться** **2.** *страд. от* **увя́зывать**

**УВЯ́НУТЬ** *сов.*; *прям.*, *перен.* һулыу, һулып бөтөү, шиңеү, шиңеп бөтөү; (*об овощах*) быжыу, быжып бөтөү; **цветы́ увя́ли** сәскәләр һулыған

**УГАДА́ТЬ** *сов.* **1.** (*отгадать*) белеү, һиҙеү, асыу, асып һалыу; (*загадку*) сисеү; **по движе́нию ве́тра угада́ть пого́ду** елдең хәрәкәтенән һауа торошон белеү; **угада́ть мы́сли собесе́дника** әңгәмәсенең уйын һиҙеү; **угада́ть зага́дку** йомаҡты сисеү **2.** *прост.* (*признать*, *узнать*) таныу, белеү; **в темноте́ не угада́ть** *кого-л.* *кемделер* ҡараңғыла танымау **3.** *прост.* (*попасть в кого-что-л. при стрельбе и т.п.*) тура (тап) килтереү (килеү), тейҙереү; **охо́тник угада́л в го́лову во́лка** аусы бүренең башына тейҙергән

**УГА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **угада́ть**

**УГА́ДЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **уга́дывать**

**УГА́Р I** *м* **1.** (*угарный газ*) еҫ, һөрөм **2.** (*болезненное состояние*) еҫ тейеү **3.** *чего, какой*; *перен.* һөрөм, ут; **уга́р увлече́ния** мауығыу уты

**УГА́Р II** *м*; *спец.* **1.** яныуҙан (ирееүҙән) кәмеү **2.** *обычно мн.* **уга́ры** эшкәртеү ҡалдыҡтары, иләү ҡалдыҡтары

**УГА́РНЫЙ I,** -ая, -ое **1.** һөрөм …ы, һөрөмлө, еҫле; **уга́рный за́пах** һөрөм еҫе **2.** *перен.* (*безудержный*) асыулы, асыуҙан шашҡан, йүгәнһеҙ; **уга́рная не́нависть** йүгәнһеҙ нәфрәт ♦ **уга́рный газ** һөрөм, еҫ (*төҫһөҙ, ағыулы газ*)

**УГА́РНЫЙ II,** -ая, -ое *спец.* **1.** яныуҙан (ирееүҙән) ҡалған, ҡалдыҡ; **уга́рное желе́зо** яныуҙан ҡалған тимер **2.** ҡалдыҡтан иләнгән; **уга́рное пряде́ние** ҡалдыҡтан иләнгән еп

**УГАСА́НИЕ** *с см.* **угаса́ть**

**УГАСА́ТЬ** *несов. см.* **уга́снуть**

**УГАСИ́ТЬ** *сов. что*; *прям.*, *перен.* һүндереү; **угаси́ть свечу́** май шәмде һүндереү; **угаси́ть чу́вства** тойғоларҙы һүндереү

**УГА́СНУТЬ** *сов.* **1.** һүнеү, һүрелеү; **ого́нь уга́с** ут һүнде **2.** *перен.* һүнеү, һүрелеү, һыуыныу; **ве́ра уга́сла** ышаныс һүнде; **жизнь в дере́вне уга́сла** ауылда тормош һүрелде **3.** *перен.* (*умереть*) үлеү, йән биреү, ғүмер өҙөлөү; **де́вушка уга́сла** ҡыҙҙың ғүмере өҙөлдө

**УГЛЕВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое углевод …ы; **углево́дный обме́н** углевод алмашыныуы

**УГЛЕВОДОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *хим.* углеводород …ы; **углеводоро́дные соедине́ния** углеводород ҡушылмалары

**УГЛЕВОДОРО́ДЫ** *мн.* (*ед.* **углеводоро́д** *м*); *хим.* углеводородтар (*углерод менән водородтан торған органик ҡушылмалар*)

**УГЛЕВО́ДЫ** *мн.* (*ед.* **углево́д** *м*); *биол.*, *хим.* углеводтар (*углерод, водород һәм кислородтан торған органик ҡушылмалар*)

**УГЛЕДОБЫВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее күмер сығарыу …ы; **угледобыва́ющая маши́на** күмер сығарыу машинаһы

**УГЛЕДОБЫ́ЧА** *ж* күмер сығарыу; **но́рма угледобы́чи** күмер сығарыу нормаһы

**УГЛЕЖЖЕ́НИЕ** *с* күмер үртәү (*күмер әҙерләү өсөн ағас яндырыу*)

**УГЛЕЖО́Г** *м* күмерсе, күмер үртәүсе (*эшсе*)

**УГЛЕКИСЛОТА́** *ж* углекислота

**УГЛЕКИ́СЛЫЙ,** -ая, -ое *хим.* углекислоталы, углекислый; **углеки́слое соедине́ние** углекислоталы ҡушылма ♦ **углеки́слые со́ли** углекислоталы тоҙҙар; **углеки́слый газ** углекислый газ

**УГЛЕНО́СНОСТЬ** *ж* (*концентрация угольного вещества в угольном месторождении*) күмер тупланышы

**УГЛЕНО́СНЫЙ,** -ая, -ое күмерле, күмере күп булған; **углено́сные пласты́** күмерле ҡатламдар

**УГЛЕОБОГАТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күмер байыҡтырғыс; **углеобогати́тельная фа́брика** күмер байыҡтырғыс фабрика

**УГЛЕОБРАЗОВА́НИЕ** *с* күмер яһалышы, күмер барлыҡҡа килеүе

**УГЛЕПОГРУ́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое күмер тейәгес, күмер тейәй торған; **углепогру́зочная маши́на** күмер тейәгес машина

**УГЛЕПРОМЫ́ШЛЕННОСТЬ** *ж* күмер сәнәғәте

**УГЛЕПРОМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое күмер сығарыу …ы, күмер сығарған; **углепромы́шленный райо́н** күмер сығарыу районы

**УГЛЕРО́Д** *м* углерод (*химик элемент*)

**УГЛЕРО́ДИСТЫЙ,** -ая, -ое углеродлы; **углеро́дистая сталь** углеродлы ҡорос

**УГЛЕРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое углерод …ы; **углеро́дные а́томы** углерод атомдары

**УГЛОВА́ТОСТЬ** *ж* **1.** (*неровность*) тигеҙһеҙ булыу, ҡырлы-мырлы булыу **2.** *перен.* (*неуклю-*

*жесть*) килбәтһеҙлек, килбәтһеҙ булыу; **углова́тость движе́ний** хәрәкәттәрҙең килбәтһеҙлеге

**УГЛОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неровный*) тигеҙһеҙ, ҡырлы-мырлы; **углова́тые ка́мни** ҡырлы-мырлы таштар **2.** *перен.* (*неуклюжий*) ибәтәйһеҙ, килбәтһеҙ; **углова́тая похо́дка** килбәтһеҙ йөрөш

**УГЛОВО́Й,** -ая, -ое **1.** *мат.*, *спец.* мөйөш ...ы; **углово́й гра́дус** мөйөш градусы **2.** мөйөш ...ы, мөйөшлө, мөйөшләнгән; **углово́й вы́ступ** мөйөшләнгән урын **3.** мөйөштәге; **углово́й дом** мөйөштәге йорт; **углова́я ко́мната** мөйөштәге бүлмә ♦ **углово́й уда́р** *спорт.* (тупты) мөйөштән тибеү

**УГЛОМЕ́Р** *м*; *тех.*(*прибор*) мөйөшлөк, мөйөш үлсәгес

**УГЛОМЕ́РНЫЙ: угломе́рные инструме́нты** мөйөш үлсәгес ҡулайламалары (*кҫк йөҙөндә, ерҙә, планда*)

**УГЛУБИ́ТЬ** *сов. что* **1.** тәрәнәйтеү; **углуби́ть я́му** соҡорҙо тәрәнәйтеү **2.** *перен.* тәрәнәйтеү, төбөнә төшөү; **углуби́ть зна́ния** белемде тәрәнәйтеү **3.** (*вбить глубже*) тәрәнәйтә (батыра, ҡаға) биреү (төшөү); **углуби́ть сва́и моста́** күперҙең терәү бағаналарын ҡаға биреү

**УГЛУБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тәрәнәйеү, тәрәнәйә барыу (төшөү); **вода́ углуби́лась** һыу тәрәнәйҙе **2.** *во что* инеп (кереп) китеү; **углуби́ться в ча́щу ле́са** урман шырлығына инеп китеү **3.** *во что*; *перен.* сумыу, тәрәнерәк инеү; **углуби́ться в воспомина́ния** хәтирәләргә сумыу; **углуби́ться в чте́ние** уҡыуға сумыу **4.** *перен.* тулыланыу, камиллашыу, байыу; **зна́ния углуби́лись** белем тулыланды **5.** *перен.* киҫкенләшеү, ҡырҡыулашыу; **противоре́чия углуби́лись** ҡаршылыҡтар киҫкенләште ♦ **углуби́ться в себя́** уйға батыу (сумыу)

**УГЛУБЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **углуби́ть** — **углубля́ть**, **углуби́ться** — **углубля́ться 2.** (*выемка, впадина*) уйым, соҡор, сөмкә **3.** *мор.* (*осадка*) батыш (*судноның һыуға сумыу тәрәнлеге*)

**УГЛУБЛЁННЫЙ,** -ая -ое **1.** *прич. от* **углуби́ть 2.** *прил.* (*имеющий некоторую глубину*) тәрәнәйгән, соҡорайған; **углублённое ме́сто на щеке́** биттәге соҡорайған урын **3.** *прил.*; *перен.* (*основательный*) тәрән, төплө, нигеҙле; **углублённая рабо́та над те́кстом** текст өҫтөндә төплө эш

**УГЛУБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **углуби́ть**

**УГЛУБЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **углуби́ться 2.** *страд. от* **углубля́ть**

**УГЛЯДЕ́ТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *кого-что* күреп ҡалыу, ҡарап алыу **2.** *за кем-чем* и *без доп.* ҡарап (күреп) тороу, күҙәтеп тороу; **за все́ми не угляди́шь** бөтәһен дә күреп бөтөрөп булмай

**УГНА́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡыуыу, ҡыуалау, ҡыуып ебәреү, ҡыуып алып китеү; **ста́до угна́ли на па́стбище** көтөүҙе көтөүлеккә алып киттеләр **2.** (*увести*) тейәп (күсереп) алып китеү; **угна́ть плот по реке́** һалды йылға буйлап алып китеү **3.** *разг.* (*похитить*) ҡыуып (урлап) алып китеү, алып (урлап) ҡасыу; **угна́ть маши́ну** машинаны урлап алып китеү **4.** *прост.* ҡыуыу, ебәреү; **угна́ть на лесоразрабо́тки** ағас эшенә ҡыуыу

**УГНА́ТЬСЯ** *сов. за кем-чем* (*обычно с отрицанием*) **1.** ҡыуып (йүгереп) етеү, ҡалышмау, өлгөрөү; **не угна́ться за ним** уның артынан ҡыуып етеп булмай **2.** *перен.*, *разг.* ҡыуып етеү, етешеү, тиңләшеү; **в учёбе за ним не угна́ться** уҡыуҙа уға етешеп булмай

**УГНЕЗДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оялау, оя ҡороу; **ча́йки угнезди́лись в ска́лах** аҡсарлаҡтар ҡаяла оя ҡорғандар

**УГНЕСТИ́** *сов.*; *уст. см.* **угнета́ть** 1

**УГНЕТА́ТЕЛЬ** *м* иҙеүсе, йәберләүсе, залим

**УГНЕТА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** иҙеү, ҡыҫыу, баҫыу, золомлоҡ итеү **2.** ғазаплау, яфалау; **его́ угнета́ли мра́чные мы́сли** уны ауыр уйҙар яфалай ине **3.** (*подавлять развитие, жизнедеятельность*) баҫыу, ҡыҫыу, тотҡарлау; **угнета́ть расте́ние** үҫемлектең үҫешен тотҡарлау

**УГНЕТА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **угнета́ть**

**УГНЕТА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **угнета́ть 2.** *прил.* төшөнкө, ауыр, күңелһеҙ; **угнета́ющее впечатле́ние** ауыр тәьҫир

**УГНЕТЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **угнета́ть** 1, 3 — **угнести́ 2.** *перен.* (*подавленное состояние*) бойоҡлоҡ, күңел төшөнкөлөгө, төшөнкөлөк

**УГНЕТЁННОСТЬ** *ж* **1.** иҙелгәнлек, йәберләнгәнлек, иҙелгән (йәберләнгән) булыу **2.** *см.* **угнете́ние** 2

**УГНЕТЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **угнести́ 2.** *прил.* (*притесняемый*, *эксплуатируемый*) иҙелгән, баҫылған, йәберләнгән, ҡыйырһытылған; **угнетённый наро́д** иҙелгән халыҡ **3.** *прил.*; *перен.* бойоҡ, төшөнкө; **угнетённое состоя́ние** төшөнкө хәл **4.** *прил.* (үҫеүе) тотҡарланған, ҡыҫылған; **угнетённое расте́ние** үҫеүе тотҡарланған үҫемлек

**УГОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **уговори́ть**

**УГОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уговори́ться 2.** *страд. от* **угова́ривать**

**УГОВО́Р** *м* **1.** өгөт, дим, ризалаштырыу; **поддава́ться угово́рам** өгөткә бирелеү **2.** *разг.* һүҙ ҡуйышыу, вәғәҙәләшеү, килешеү; **де́йствовать по угово́ру** һүҙ ҡуйышып эш итеү ♦ **угово́р доро́же де́нег** вәғәҙә — иман

**УГОВОРИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** димләү, күндереү, ризалаштырыу; **уговори́ть друзе́й пойти́ в похо́д** дуҫтарҙы походҡа барырға күндереү **2.** *разг.* (*успокоить*) көйләү, тынысландырыу, йыуатыу, әүрәтеү, алдаштырыу, албырғатыу

**УГОВОРИ́ТЬСЯ** *сов. с кем, о чём*; *разг.* һүҙ ҡуйышыу (беркетеү), вәғәҙәләшеү, килешеү; **уговори́ться пойти́ в кино́** киноға барырға һүҙ ҡуйышыу

**УГО́ДА: в уго́ду** *кому-чему* теләген үтәп, ярарға тырышып

**УГОДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кому*, *на кого* ярау, күңелен табыу, ҡәнәғәтләндереү; **всем не угоди́шь**

бөтәһенә лә ярап булмай **2.** (*попасть куда-л. вовремя*) эләгеү, өҫтөнә тура килеү, өҫтөнә барып сығыу; **угоди́ть на сва́дьбу** туй өҫтөнә тура килеү **3.** (*при движении попасть куда-л.*) төшөү, эләгеү; **лиса́ угоди́ла в капка́н** төлкө ҡапҡанға барып эләкте **4.** *в кого-что, кому, во что*; *разг.* атып тейҙереү (тура килтереү), һуғып тейҙереү, тейҙереү, тейеү; **угоди́ть мячо́м в окно́** тупты тәҙрәгә тейҙереү; **пу́ля угоди́ла ему́ в плечо́** пуля унын иңбашына тейгән **5.** (*оказаться в каких-л. обстоятельствах*) эләгеү; **угоди́л в тюрьму́** төрмәгә эләккән

**УГО́ДЛИВОСТЬ** *ж* ярамһаҡлыҡ, ялағайлыҡ, ҡуштанлыҡ, ярарға тырышыусанлыҡ

**УГО́ДЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* яраусан, ярамһаҡ, ҡуштан; **уго́дливая жена́** ҡуштан ҡатын **2.** (*льстивый, заискивающий*) ярамһаҡ, ялағай, юха, ҡуштан; **уго́дливый челове́к** ялағай кеше; **уго́дливый тон** ярамһаҡ тауыш

**УГО́ДНИК** *м* **1.** *разг.* юха, ялағай, ҡуштан, ярамһаҡ кеше **2.** (*в религиозном представлении — святой*) алла бәндәһе, әүлиә

**УГО́ДНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ярамһаҡланыу, ярарға тырышыу, ҡуштанланыу, ялағайланыу, юхаланыу; **уго́дничать пе́ред нача́льством** түрәгә ярамһаҡланыу

**УГО́ДНО 1.** *кому в знач. сказ.* кәрәк, уңайлы, яйлы, теләһәгеҙ; **что вам уго́дно?** һеҙгә ни кәрәк?; **как вам бу́дет уго́дно** һеҙгә нисек яйлы булыр **2.** *частица* (*в сочетании с вопросительными местоимениями и наречиями*) булһа ла, теләһә; **где уго́дно** ҡайҙа булһа ла; **како́й уго́дно** ниндәй булһа ла, теләһә ниндәй; **как уго́дно** нисек булһа ла, теләһә нисек; **когда́ уго́дно** ҡасан булһа ла, теләһә ҡасан; **кто уго́дно** кем булһа ла, теләһә кем; **куда́ уго́дно** ҡайҙа булһа ла, теләһә ҡайҙа; **отку́да уго́дно** ҡайҙан булһа ла, теләһә ҡайҙан; **ско́лько уго́дно** күпме (ни саҡлы) булһа ла, теләһә күпме; **что уго́дно** нимә булһа ла, теләһә нимә; **что уго́дно мо́жете купи́ть** нимә булһа ла ала алаһығыҙ ♦ **е́сли уго́дно** *в знач. вводн. сл.* әйтәйек, кәрәк икән; **не уго́дно ли** кәрәк түгелме; **ско́лько душе́ уго́дно** йәне теләгәнсә

**УГО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *кому* яраҡлы, кәрәкле, теләгән; **в уго́дное тебе́ вре́мя** һиңә кәрәкле ваҡытта; **челове́к, уго́дный всем** барыһына ла яраҡлы кеше

**УГО́ДЬЕ** *с* урын, биләмә; **земе́льные уго́дья** ер биләмәләре; **лесны́е уго́дья** урман биләмәләре; **охо́тничьи уго́дья** һунарсылыҡ биләмәләре

**УГОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **угоди́ть** 1

**У́ГОЛ** *м* **1.** *мат., спец.* мөйөш; **о́стрый у́гол** ҡыҫынҡы мөйөш; **прямо́й у́гол** тура мөйөш; **у́гол отраже́ния** сағылыу мөйөшө; **у́гол паде́ния** ауыу мөйөшө; **у́гол прице́ла** тоҫҡау мөйөшө **2.** мөйөш, сат; **у́гол до́ма** өй мөйөшө; **у́гол стола́** өҫтәл мөйөшө; **на углу́ у́лицы** урам сатында **3.** (*жилище*) мөйөш, баш терәр, һыйыныр урын; **име́ть свой у́гол** һыйыныр урын булыу **4.** *перен.* мөйөш, урын; **глухо́й у́гол** ҡараңғы мөйөш ♦ **загна́ть в у́гол** килтереп ҡыҫыу; **из-за угла́** аҫтыртын, арттан, һырттан, аңғармаҫтан; **пере́дний у́гол** түр; **прижа́ть (припере́ть) в у́гол** мөйөшкә ҡыҫыу, ауыр хәлгә ҡуйыу, ҡыҫымға алыу; **ста́вить в у́гол** мөйөшкә баҫтырыу (баҫтырып ҡуйыу); **из угла́ в у́гол (ходи́ть)** түрле-ҡырлы (йөрөү)

**УГОЛО́ВНИК** *м*; *разг.* енәйәтсе

**УГОЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ауыр енәйәтсел, енәйәт ...ы; **уголо́вное де́ло** енәйәт эше; **уголо́вное преступле́ние** ауыр енәйәтсел эш **2.** енәйәт ...ы, енәйәттәр тураһындағы; **уголо́вный ко́декс** енәйәт кодексы; **уголо́вное пра́во** енәйәт буйынса хоҡуҡтар йыйынтығы ♦ **уголо́вный ро́зыск** *см.* **ро́зыск**

**УГОЛО́ВЩИНА** *ж*; *разг.* (*уголовное дело*) ауыр енәйәт **2.** *собир.* (*уголовники*) ауыр енәйәтселәр

**УГОЛО́К** *м*; *уменьш. от* **у́гол** 2, 3, 4 ♦ **кра́сный уголо́к** ҡыҙыл мөйөш (*агитация алып барыу урыны*)

**У́ГОЛЬ** *м* күмер; **ка́менный у́голь** таш күмер; **древе́сный у́голь** ағас күмере ♦ **бе́лый у́голь** аҡ күмер (*һыу көсө*); **голубо́й у́голь** зәңгәр күмер (*ел көсө*); **как на у́гольях (на угля́х) сиде́ть (быть)** ҡуҙға баҫҡан кеүек йөрөү (булыу)

**УГО́ЛЬНИК** *м* мөйөшлөк (*өсмөйөш формаһындағы линейка*)

**У́ГОЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күмер ...ы, күмер сығарыу ...ы; **у́гольная ша́хта** күмер шахтаһы; **у́гольная промы́шленность** күмер сәнәғәте; **у́гольные пласты́** күмер ҡатламдары

**...УГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙә "мөйөшлө" мәғәнәһен аңлатҡан икенсе өлөшө, мәҫ.*, **треуго́льный** өс мөйөшлө; **пятиуго́льный** биш мөйөшлө

**У́ГОЛЬЩИК** *м* **1.** (*шахтёр*) күмерсе **2.** *уст.* (*изготовитель древесного угля*) күмер үртәүсе, күмерсе

**УГОМО́Н: нет угомо́ну** *прост.* тынғы юҡ, тынғы бирмәйҙәр

**УГОМОНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* тынысландырыу, тыйыу; **угомони́ть дете́й** балаларҙы тыйыу

**УГОМОНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тынысланыу, тыныу, тыйылыу; **де́ти угомони́лись** балалар тыйылды; **ве́тер угомони́лся** ел тынды

**УГО́Н** *м см.* **угна́ть** — **угоня́ть**; **уго́н самолёта** самолётты алып ҡасыу

**УГО́НЩИК** *м* ҡыуып алып китеүсе, урлап алып китеүсе (ҡасыусы)

**УГОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **угна́ть**

**УГОРА́ЗДИТЬ** *сов. кого-что* и *с неопр., безл.* -рға/-ргә кәрәк инде, -һын/-һен әле, -һа/-һә ни булған; **угора́здило же уе́хать в э́тот день** ошо көндә китеп бармаһа ни булған

**УГОРА́ТЬ I** *несов. см.* **угоре́ть** I

**УГОРА́ТЬ II** *несов. см.* **угоре́ть** II

**УГОРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* (*угоревший*) еҫ тейгән, еҫ тейеп ауырыған **2.** *перен., разг.* (*неурав-*

*новешенный*) тынысһыҙ, сәбәлән ♦ **как угоре́лый бежа́ть (нести́сь и т.п.)** ут ҡапҡандай йүгереү (йөрөү); **как угоре́лая ко́шка** утҡа баҫҡан бесәй кеүек

**УГОРЕ́ТЬ I** *сов.* еҫ (һөрөм) тейеү

**УГОРЕ́ТЬ II** *сов.*; *тех.* (*уменьшиться при плавке, горении*) кәмеү, шиңеү, иреп (янып) кәмеү

**У́ГОРЬ I** *м* (*рыба*) йыланбалыҡ

**У́ГОРЬ II** *м* (*прыщ*) һытҡы; **лечи́ться от угре́й** һытҡынан дауаланыу

**УГОСТИ́ТЬ** *сов. кого-что, чем* һыйлау; **угости́ть дру́га ча́ем** дуҫты сәй менән һыйлау

**УГОСТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һыйланыу

**УГОТА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **угото́вить**

**УГОТО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое *высок.* әҙерләнгән, тәғәйенләнгән

**УГОТО́ВИТЬ** *сов. что* әҙерләү, әҙерләп ҡуйыу, тәғәйенләү

**УГОТОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **угото́вить**

**УГОЩА́ТЬ** *несов. см.* **угости́ть**

**УГОЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **угости́ться 2.** *страд. от* **угоща́ть**

**УГОЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **угости́ть** — **угоща́ть 2.** (*еда, питьё*) һый, һый-хөрмәт

**УГРЕВА́ТЫЙ,** -ая, -ое һытҡылы, һытҡы сыҡҡан; **угрева́тое лицо́** һытҡылы бит

**УГРО́БИТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *кого* (*убить*) үлтереү, һәләк итеү **2.** *что* (*испортить*) боҙоу, һәләк итеү, эшлектән сығарыу; **угро́бить до́брое де́ло** изге эште һәләк итеү

**УГРОЖА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡурҡынысла, хәтәр; **угрожа́емое состоя́ние** ҡурҡынысла хәл

**УГРОЖА́ТЬ** *несов.* **1.** ҡурҡытыу, янау; **угрожа́ть судо́м** суд менән ҡурҡытыу; **угрожа́ть наказа́нием** яза биреү менән янау **2.** *чему* ҡурҡыныс (хәүеф) аҫтына ҡуйыу, ҡурҡыныс (хәүеф) хәлендә булыу (тороу); **угрожа́ть здоро́вью** һаулыҡты ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыу; **угрожа́ть благополу́чию** именлекте ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыу **3.** *чем* и *с неопр.* ҡурҡыныс (хәүеф) янау; **угрожа́ть наводне́нием** һыу ташыу ҡурҡынысы янау; **угрожа́ть сме́ртью** үлем ҡурҡынысы янау

**УГРОЖА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **угрожа́ть 2.** *прил.* ҡурҡыта (янай) торған; **угрожа́ющая по́за** ҡурҡыта торған ҡиәфәт **3.** *прил.* (*опасный*) ҡурҡынысла, хәүефле, хәүеф-хәтәрле, хәтәр; **угрожа́ющее положе́ние** ҡурҡынысла хәл

**УГРО́ЗА** *ж* **1.** ҡурҡытыу, янау; **де́йствовать угро́зами** янау менән эш итеү **2.** ҡурҡыныс, хәтәр, хәүеф-хәтәр; **быть под угро́зой разруше́ния** емерелеү ҡурҡынысы аҫтында булыу; **угро́за войны́** һуғыш ҡурҡынысы

**УГРО́ЗЫСК** *м* енәйәтте тикшереү бүлеге

**У́ГРО-ФИ́НСКИЙ: у́гро-фи́нские языки́** *лингв. см.* **фи́нно-угро́рские языки́**

**УГРО́ХАТЬ** *сов. что*; *прост.* **1.** (*убить*) үлтереү, юҡ итеү, йәһәннәмгә оҙатыу **2.** (*истратить*) күп аҡса һалыу (тотоноу); **угро́хать все де́ньги на маши́ну** бөтә аҡсаны машинаға һалыу

**УГРЫЗА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **угры́зть 2.** *разг.* (*терзать*) ғазаплау, ыҙалау; **меня́ угрыза́ла со́весть** мине выждан ғазапланы

**УГРЫЗЕ́НИЕ** *с* **1.** *разг. см.* **угры́зть** — **угрыза́ть 2.** (*беспокойное состояние из-за чувства своей вины*) ғазап; **угрызе́ния со́вести** выждан ғазабы

**УГРЫ́ЗТЬ** *сов.*; *разг.* кимереү, кимереп ашау; **я́блока не угры́зть** алма кимерерлек түгел

**УГРЮ́МОСТЬ** *ж* **1.** ҡараңғы сырайлылыҡ, күңелһеҙлек, томһалыҡ **2.** ҡараңғылыҡ, күңелһеҙлек

**УГРЮ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡараңғы (һытыҡ) сырайлы, күңелһеҙ, томһа; **угрю́мый челове́к** ҡараңғы сырайлы кеше **2.** *перен.* ҡараңғы, күңелһеҙ; **угрю́мый лес** ҡараңғы урман

**УДА́В** *м* быуар йылан

**УДАВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **уда́ться**

**УДАВИ́ТЬ** *сов. кого*; *прост.* быуыу, быуып үлтереү

**УДАВИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* аҫылынып (быуылып) үлеү, аҫылыныу, быуылыу

**УДА́ВЛЕННИК** *м*; *прост.* быуылып (аҫылынып) үлгән кеше, аҫып (быуып) үлтерелгән кеше

**УДА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **удави́ть**

**УДА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удави́ться 2.** *страд. от* **уда́вливать**

**УДАЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **удали́ть** — **удаля́ть, удали́ться** — **удаля́ться**; **удале́ние пя́тен с оде́жды** кейемдәге таптарҙы бөтөрөү **2.** (*отдаление*) алыҫлашыу, йыраҡлашыу

**УДАЛЁННОСТЬ** *ж* алыҫлыҡ, алыҫта булыу, алыҫ булыу, йыраҡлыҡ, йыраҡта булыу

**УДАЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **удали́ть 2.** *прил.* алыҫтағы, йыраҡтағы, алыҫ, йыраҡ; **удалённые от це́нтра дере́вни** үҙәктән алыҫ ауылдар

**УДАЛЕ́Ц** *м*; *разг.* батыр, ҡыйыу, сая кеше

**УДАЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*отдалить*) йыраҡайтыу, йыраҡҡа ҡуйыу, алыҫлатыу, алыҫайтыу, алыҫҡа күсереү; **удали́ть мише́нь** сәпте алыҫайтыу **2.** сығарыу; (*кого*) сығарып ебәреү, ҡыуып сығарыу; (*что*) сығарып ташлау (ҡуйыу); **удали́ть посторо́нних** сит кешеләрҙе сығарып ебәреү **3.** *что* алыу, һурыу, алдырыу, һурып алыу; **удали́ть зуб** теш(те) һурыу **4.** *что* йыуып (юйып) юҡ итеү, бөтөрөү; **удали́ть пя́тна с пла́тья** күлдәктәге таптарҙы бөтөрөү **5.** (*отстранить от чего-л.*) ситләтеү, алыу, ебәреү **6.** (*отдалить — о человеке*) ситләтеү, алыҫлаштырыу

**УДАЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*отдалиться*) йыраҡайыу, йыраҡлашыу, алыҫлашыу, алыҫайыу; **удали́ться от до́ма** өйҙән йыраҡайыу **2.** (*уйти*) сығыу, китеү, сығып китеү; **удали́ться в свою́ ко́мнату** үҙ бүлмәһенә сығыу **3.** (*отстраниться*) ситләшеү, китеү; **удали́ться от дел** эштән ситләшеү **4.** (*стать далёким, чужим*) алыҫлашыу, ситләшеү; **удали́ться от друзе́й** дуҫтарҙан ситләшеү ♦ **удали́ться на поко́й** эштән китеү, ялға сығыу

**УДАЛО́Й** и **УДА́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыйыу, батыр; **удало́й боє́ц** батыр яугир **2.** *перен.* (*испол-*

*ненный удали*) дәртле, ғәйрәтле; **удала́я пе́сня** дәртле йыр; **удала́я пля́ска** ғәйрәтле бейеү

**У́ДАЛЬ** *ж* ғәйрәтлелек, егетлек, саялыҡ; **молоде́цкая у́даль** егеттәр саялығы

**УДАЛЬСТВО́** *с*; *разг. см.* **у́даль**

**УДАЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **удали́ть**

**УДАЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удали́ться** **2.** *страд. от* **удаля́ть**

**УДА́Р** *м* **1.** һуғыу, бәреү, сабыу; **уда́р прикла́дом** приклад менән һуғыу; **нанести́ уда́р** һуғып ебәреү; **уда́р са́блей** ҡылыс менән сабыу **2.** (*звук от удара*) тауыш; **уда́ры гро́ма** күкрәү тауышы; **уда́ры ко́локола** ҡыңғырау тауышы **3.** тибеү, тибеш; **уда́ры пу́льса** пульс тибеше **4.** (*нападение*) һөжүм, бәреү, бәрелеш; **стреми́тельный уда́р та́нков** танкыларҙың ҡыҙыу һөжүме **5.** *перен.* кисереш, ҡайғы, бәхетһеҙлек; **уда́ры судьбы́** яҙмыш бәхетһеҙлектәре **6.** (*кровоизлияние в мозг*) һуғыу, мейегә ҡан һауыу ♦ **со́лнечный уда́р** ҡояш тейеү (үтеү), көн һуғыу; **теплово́й уда́р** *см.* **теплово́й**; **в уда́ре быть** күтәренке кәйефтә булыу; **под уда́ром быть (находи́ться)** ҡурҡыныс (хәүеф) аҫтында булыу (тороу); **ста́вить под уда́р** *кого-что* ҡурҡыныс (хәүеф) аҫтына ҡуйыу

**УДАРЕ́НИЕ** *с* **1.** *лингв.* баҫым, баҫым билдәһе; **логи́ческое ударе́ние** логик баҫым; **поста́вить ударе́ние** баҫым (билдәһе) ҡуйыу **2.** *перен.* баҫым, баҫым яһау; **произноси́ть сло́во с осо́бым ударе́нием** һүҙҙе айырым баҫым менән әйтеү ♦ **восходя́щее ударе́ние** күтәрелә барыусы баҫым; **нисходя́щее ударе́ние** түбәнәйә барыусы баҫым

**УДА́РЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уда́рить** 1; **2.** *прил.*; *лингв.* баҫымлы, баҫым төшкән; **уда́ренный слог** баҫымлы ижек

**УДА́РИТЬ** *сов.* **1.** *что, по чему, во что* һуғыу, ҡағыу, сабыу, һуғып (бәреп, ҡағып) ебәреү; **уда́рить па́лкой** таяҡ менән һуғыу; **уда́рить кулако́м по́ столу** өҫтәлгә йоҙроҡ менән һуғыу; **уда́рить по лицу́** биткә һуғып ебәреү **2.** *что, во что* ҡағыу, һуғыу; **уда́рить в бараба́н** барабан ҡағыу; **часы́ уда́рили по́лночь** сәғәт төн уртаһын һуҡты **3.** һөжүм итеү, ташланыу; **уда́рить с ле́вого фла́нга** һул флангынан һөжүм итеү **4.** *что*; *перен.* һуғыу; **уда́рить трево́гу** тревога һуғыу; **уда́рить отбо́й** отбой һуғыу **5.** (*о явлениях природы*) ебәреү, башлау; **внеза́пно уда́рил ли́вень** ҡапыл ҡойма ямғыр башланды **6.** *во что, на что*; *разг.* бәреү, бәрелеү; **свет уда́рил в лицо́** биткә яҡтылыҡ бәрҙе; **за́пах табака́ уда́рил в нос** танауға тәмәке еҫе бәрелде ♦ **уда́рить по карма́ну** кеҫәгә һуғыу, аҡсаһыҙ ҡалыу; **уда́рить по рука́м** ҡул бирешеү, килешеү; **не уда́рить в грязь лицо́м** *см.* **лицо́**; **па́лец (па́льцем) о па́лец не уда́рить** ҡыл да ҡыбырлатмау

**УДА́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** һуғылыу, бәрелеү, тейеү, барып тейеү; **уда́риться о зе́млю** ергә бәрелеү; **пу́ля уда́рилась о сте́ну** пуля стенаға барып тейҙе **2.** *во что* и *с неопр.*; *перен.*, *разг.* башлау, тотоноу, керешеү; **уда́риться в бе́гство** йүгереп китеү, ҡаса башлау; **уда́риться в слёзы** илай башлау, иларға тотоноу **3.** *во что*; *перен.*, *разг.* (*увлечься*) бирелеү, бирелеп китеү; **уда́риться в воспомина́ния** хәтирәләргә бирелеп китеү ♦ **уда́риться об закла́д** отошҡа бәхәсләшеү

**УДА́РНИК I** *м*; *воен.* **1.** сирткес (*мылтыҡта*) **2.** *тех.* бәргес, ударник (*механизмда*) **3.** *муз.* ударник, һуғыусы, һуғып уйнаусы

**УДА́РНИК II** *м* и **УДА́РНИЦА** *ж*; *ист.* алдынғы (хеҙмәткәр), ударник; **уда́рник труда́** хеҙмәт алдынғыһы

**УДА́РНИЧЕСТВО** *с* ударсылыҡ

**УДА́РНЫЙ I,** -ая, -ое **1.** *муз.* ҡағып (һуғып, бәреп) уйнала торған, һуҡма, ҡаҡма; **уда́рные музыка́льные инструме́нты** ҡаҡма музыкаль ҡоралдар **2.** *воен.* һөжүм яһай торған, һөжүм итеүсе, хәл иткес; **уда́рная а́рмия** һөжүм итеүсе армия; **уда́рный батальо́н** һөжүм итеүсе батальон **3.** *лингв.* баҫымлы, баҫым төшә торған; **уда́рный слог** баҫымлы ижек

**УДА́РНЫЙ II,** -ая, -ое **1.** алдынғы, удар, ударниктар ...ы; **уда́рная стро́йка** удар төҙөлөш **2.** (*важный, спешный*) бик мөһим, кисектергеһеҙ; **уда́рное зада́ние** бик мөһим эш

**УДАРЯ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **ударя́ть** 1; **2.** *прил.*; *лингв. см.* **уда́ренный** 2

**УДАРЯ́ТЬ** *несов. см.* **уда́рить**

**УДАРЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **уда́риться**

**УДА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** уңышлы булыу (булып сығыу, барып сығыу); **опера́ция удала́сь** операция уңышлы булды **2.** (*выйти удачным, получиться*) уңыу, уңышлы булыу (булып сығыу); **пирожки́ удали́сь** бөйөрөктәр уңды; **ли́чная жизнь его́ не удала́сь** уның шәхси тормошо уңманы **3.** *кому* и *с неопр. безл.* булыу, тура килеү, барып сығыу; **встре́титься не удало́сь** осрашып булманы; **сего́дня уе́хать не удало́сь** бөгөн китеп булманы

**УДА́ЧА** *ж* уңыш, далан; **больша́я уда́ча** ҙур уңыш; **пожела́ть уда́чи** уңыш теләү; **уда́ча охо́тника** һунарсы даланы

**УДА́ЧЛИВОСТЬ** *ж* **1.** уңышлылыҡ, уңышлы булыу, даланлылыҡ, даланлы булыу; **удивля́ться его́ уда́чливости** уның уңышлылығына аптырау **2.** (*успешность*) уңышлылыҡ, уңышлы булыу

**УДА́ЧЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** уңа торған, уңыусан, даланлы; **уда́чливый челове́к** даланлы кеше **2.** (*успешный*) уңышлы; **уда́чливая охо́та** уңышлы һунар

**УДА́ЧНИК** *м* и **УДА́ЧНИЦА** *ж*; *разг.* даланлы кеше, уңа торған кеше

**УДА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое уңышлы, уңышлы сыҡҡан, уңышлы булған; **уда́чная пое́здка** уңышлы сәфәр; **уда́чная поку́пка** уңышлы һатып алынған әйбер

**УДВА́ИВАТЬ** *несов. см.* **удво́ить**

**УДВА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удво́иться** **2.** *страд. от* **удва́ивать**

**УДВОЕ́НИЕ** *с см.* **удво́ить** — **удво́иться**; **удвое́ние чи́сленности населе́ния** халыҡ һанының икеләтә артыуы

**УДВО́ЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **удво́ить** **2.** *прил.* икеләтә, икеләтә артыҡ; **рабо́тать с удво́енной эне́ргией** икеләтә дәрт менән эшләү **3.** *прил.*; *лингв.* ҡуш, ике тапҡыр ҡабатланған; **удво́енная бу́ква** ҡуш хәреф

**УДВО́ИТЬ** *сов. что* **1.** икеләтеү, икеләтә арттырыу, бермә-бер арттырыу; **удво́ить опла́ту** түләүҙе икеләтә арттырыу **2.** көсәйтеү; **удво́ить внима́ние** иғтибарҙы көсәйтеү; **удво́ить уси́лия** тырышлыҡты көсәйтеү

**УДВО́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** икеләтә артыу, ике тапҡырға артыу, бермә-бер артыу; **населе́ние села́ удво́илось** ауыл халҡы ике тапҡырға артты **2.** көсәйтеү; **внима́ние к больно́му удво́илось** ауырыуға иғтибар көсәйҙе

**УДЕ́Л I** *м*; *ист.* **1.** удел, биләмә, биләү (*XII—XVI бб. Руста кенәз ҡулы аҫтындағы өлкә*) **2.** удел (*батшаның биләгән ерҙәре, мөлкәте*)

**УДЕ́Л II** *м* (*доля, судьба*) өлөш, яҙмыш, тәҡдир; **уде́л храбреца́** батыр яҙмышы; **уде́л поэ́та** шағир яҙмышы

**УДЕЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* бүлеү, бүлеп биреү, өлөш сығарыу; **удели́ть часть состоя́ния** мөлкәттән өлөш сығарыу **2.** биреү, бүлеү; **удели́ть внима́ние** иғтибар биреү; **удели́ть вре́мя** ваҡыт бүлеү

**УДЕ́ЛЬНЫЙ I,** -ая, -ое *ист.* удел ...ы, биләмә ...ы; **уде́льный князь** удел кенәзе; **уде́льные зе́мли** удел ерҙәре

**УДЕ́ЛЬНЫЙ II,** -ая, -ое *физ.* сағыштырма; **уде́льное сопротивле́ние** сағыштырма ҡаршылыҡ; **уде́льный вес** сағыштырма ауырлыҡ ♦ **уде́льный вес** *кого-чего* тотҡан урыны

**У́ДЕРЖ: без у́держу** тыйыла (туҡтай) алмай, туҡтауһыҙ; **нет у́держу** *на кого* тыйыуһыҙ, туҡтатып булмай; **не знать у́держу** туҡтауҙы (сиген) белмәү, белекһеҙ булыу

**УДЕРЖА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **удержа́ть** **2.** (*удержанная сумма*) тотоп алып ҡалынған аҡса

**УДЕРЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тотоп (алып) ҡалыу, ысҡындырмау, төшөрмәй ҡалыу; **удержа́ть в рука́х** ҡулда тотоп ҡалыу; **удержа́ть за́ руку** ҡулын ысҡындырмау **2.** *что* (*подавить проявление чего-л.*) тыйыу, тыйып ҡалыу (тороу), баҫып ҡалыу; **е́ле удержа́ть слёзы** йәште саҡ тыйып тороу; **удержа́ть смех** көлөүҙе тыйып ҡалыу **3.** *что* һаҡлап (алып) ҡалыу, ысҡындырмау; **удержа́ть го́род** ҡаланы һаҡлап ҡалыу; **удержа́ть пе́рвенство в соревнова́нии** ярышта беренселекте һаҡлап ҡалыу; **стара́ться удержа́ть своё ме́сто** үҙеңдең урыныңды ысҡындырмаҫҡа тырышыу **4.** *что* (*не отдать*) тотоп алып ҡалыу; **удержа́ть из расчёта** расчёттан тотоп алып ҡалыу

**УДЕРЖА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*устоять, не упасть*) тотоноп (тороп) ҡалыу, йығылмай (тороп) ҡалыу, баҫып тора алыу; **удержа́ться на нога́х** аяҡҡа баҫып тора алыу **2.** (*не сдать позиции*) тороп ҡалыу, урынында ҡалыу, тора алыу; **удержа́ться до ве́чера на ста́рых пози́циях** кискә хәтле элекке позицияла тороп ҡалыу **3.** *от чего* тыйылып ҡалыу (тороу), түҙә алыу, түҙеп тороу; **удержа́ться от сме́ха** көлөүҙән тыйылып ҡалыу

**УДЕ́РЖИВАТЬ** *несов. см.* **удержа́ть**

**УДЕ́РЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удержа́ться** **2.** *страд. от* **уде́рживать**

**УДЕСЯТЕРИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*увеличить в десять раз*) унлата арттырыу, ун тапҡыр арттырыу **2.** *перен.* (*усилить во много раз*) бик ныҡ арттырыу, күп тапҡыр көсәйтеү; **удесятери́ть стара́ния** тырышлыҡты күп тапҡыр көсәйтеү

**УДЕСЯТЕРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** унлата (ун тапҡыр) артыу **2.** *перен.* бик ныҡ артыу, күп тапҡыр көсәйеү; **си́лы удесятери́лись** көс бик ныҡ артты

**УДЕСЯТЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **удесятери́ть**

**УДЕСЯТЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удесятери́ться** **2.** *страд. от* **удесятеря́ть**

**УДЕШЕВИ́ТЬ** *сов. что* арзанайтыу, арзанлатыу, осһоҙландырыу, осһоҙлатыу

**УДЕШЕВИ́ТЬСЯ** *сов.* арзанайыу, арзанланыу, осһоҙланыу

**УДЕШЕВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **удешеви́ть**

**УДЕШЕВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удешеви́ться** **2.** *страд. от* **удешевля́ть**

**УДИВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*поразительный, странный*) ғәжәп, ғәжәйеп, сәйер, ҡыҙыҡ; **удиви́тельное совпаде́ние** ғәжәйеп тап килеү **2.** (*необычайный*) иҫ китерлек, ғәжәпләнерлек; **у него́ удиви́тельная па́мять** уның хәтере иҫ китерлек; **ничего́ удиви́тельного** иҫ китерлек бер нәмә лә юҡ, иҫ китерлеге юҡ

**УДИВИ́ТЬ** *сов. кого-что* аптыратыу, ғәжәпләндереү, ғәжәпкә ҡалдырыу, таң (хайран, аптырашта) ҡалдырыу, иҫ китәреү; **удиви́ть остроу́мным отве́том** тапҡыр яуап менән таң ҡалдырыу; **удиви́ть неуме́стной вы́ходкой** урынһыҙ ҡыланыш менән ғәжәпләндереү; **его́ ниче́м не удиви́шь** уны бер нәмә менән дә хайран ҡалдыра алмаҫһың

**УДИВИ́ТЬСЯ** *сов.* аптырау, ғәжәпләнеү, ғәжәп итеү, таң (хайран) ҡалыу, иҫ китеү; **удиви́ться поведе́нию ребёнка** баланың тәртибенә аптырау

**УДИВЛЕ́НИЕ** *с* аптыраш, ғәжәпләнеү ♦ **на удивле́ние** *кому* ғәжәйеп (иҫ киткес, иҫ китерлек) шәп

**УДИВЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **удиви́ть** **2.** *прил.* ғәжәпләнгән, ғәжәпһенгән, таң (хайран) ҡалған, аптыраған; **смотре́ть удивлёнными глаза́ми** аптыраған күҙҙәр менән ҡарау

**УДИВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **удиви́ть**

**УДИВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **удиви́ться**

**УДИЛА́** *только мн.* ауыҙлыҡ ♦ **закуси́ть удила́** *см.* **закуси́ть**

**УДИ́ЛИЩЕ** *с* ҡармаҡ һабы (һуйылы)

**УДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡармаҡ ...ы; **уди́льные принадле́жности** ҡармаҡ кәрәк-яраҡтары

**УДИ́ЛЬЩИК** *м* ҡармаҡсы, ҡармаҡ һалыусы, балыҡ ҡармаҡлаусы

**УДИРА́ТЬ** *несов. см.* **удра́ть**

**УДИ́ТЬ** *несов. что* ҡармаҡлау, ҡармаҡ һалыу

**УДИ́ТЬСЯ** *несов.* ҡабыу, эләгеү; **здесь ры́ба хорошо́ у́дится** бында балыҡ яҡшы ҡаба

**УДЛИНЁННОСТЬ** *ж* оҙонсалыҡ, һуҙынҡылыҡ, оҙонса (һуҙынҡы) булыу

**УДЛИНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **удлини́ть 2.** *прил.* оҙонса, һуҙынҡы; **удлинённое лицо́** оҙонса бит

**УДЛИНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*сделать длинным*) оҙонайтыу, оҙайтыу; **удлини́ть рукава́ костю́ма** костюм еңен оҙонайтыу **2.** (*сделать более продолжительным*) оҙайтыу, һуҙыу; **удлини́ть ве́чернюю прогу́лку** киске йөрөүҙе оҙайтыу

**УДЛИНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** оҙонайыу; **путь удлини́лся** юл оҙонайҙы **2.** оҙайыу, һуҙылыу; **дни удлини́лись** көндәр оҙайҙы

**УДЛИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **удлини́ть**

**УДЛИНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удлини́ться 2.** *страд. от* **удлиня́ть**

**УДМУ́РТСКИЙ,** -ая, -ое удмурт ...ы, Удмуртия ...ы; **удму́ртский наро́д** удмурт халҡы; **удму́ртский язы́к** удмурт теле

**УДМУ́РТЫ** *мн.* удмурттар, удмурт халҡы // *ед.* **удму́рт** *м* удмурт ир-аты; **удму́ртка** *ж* удмурт ҡатын-ҡыҙы

**УДО́БНО 1.** *нареч* яйлап, уңайлап, яйлы (уңайлы) итеп **2.** *в знач. сказ., безл.* яйлы, уңайлы, ҡулай; **мне здесь о́чень удо́бно** миңә бында бик уңайлы

**УДО́БНОСТЬ** *ж* яйлылыҡ, уңайлылыҡ, яйлы (уңайлы) булыу, ҡулайлылыҡ; **удо́бность свя́зи** элемтәнең уңайлылығы

**УДО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яйлы, уңайлы; **удо́бный костю́м** уңайлы костюм; **удо́бное кре́сло** яйлы кресло **2.** (*подходящий*) уңайлы, уңай, ҡулайлы, ҡулай; **вы́брать удо́бное вре́мя** уңайлы ваҡыт һайлау **3.** (*уместный*) уңайлы, урынлы; **вполне́ удо́бный вопро́с** бик тә урынлы һорау

**УДОБО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "еңел", "анһат", "уңайлы", "яйлы", "ҡулайлы", "йәтеш" һ.б. мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **удобоисчисля́емый** еңел иҫәпләнә торған

**УДОБОВАРИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о пище*) еңел үҙләштерелә торған, еңел һеңеүсән **2.** *перен., разг.* (*приемлемый*) еңел ҡабул ителерлек (ителә торған), еңел үҙләштерерлек (үҙләштерелә торған), аңлайышлы; **удобовари́мый анекдо́т** еңел ҡабул итерлек көләмәс

**УДОБОИСПОЛНИ́МЫЙ,** -ая, -ое еңел үткәрелә торған, анһат үтәлә торған

**УДОБОПОНЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое еңел аңлайышлы, анһат аңлашыла торған; **удобопоня́тный язы́к** еңел аңлайышлы тел; **удобопоня́тный текст** анһат аңлашылған текст

**УДОБОПРОИЗНОСИ́МЫЙ,** -ая, -ое еңел (анһат) әйтелешле, еңел (анһат) әйтелә торған; **удобопроизноси́мое сочета́ние зву́ков** еңел әйтелешле өндәр ҡушылмаһы (теҙмәһе)

**УДОБОЧИТА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое еңел (анһат) уҡыла торған; **удобочита́емый шрифт** еңел уҡыла торған шрифт

**УДОБРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **удо́брить — удобря́ть; удобре́ние поле́й** баҫыуҙарҙы ашлау **2.** ашлама; **минера́льные удобре́ния** минераль ашламалар

**УДОБРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ашлау ...ы, ашлау өсөн; **удобри́тельная смесь** ашлау ҡатнашмаһы

**УДО́БРИТЬ** *сов. что* ашлау; **удо́брить зе́млю наво́зом** ерҙе тireҫ менән ашлау

**УДОБРЯ́ТЬ** *несов. см.* **удо́брить**

**УДОБРЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **удобря́ть**

**УДО́БСТВО** *с* **1.** уңайлылыҡ, ҡулайлылыҡ, яйлылыҡ; **для удо́бства люде́й** кешеләргә уңайлылыҡ өсөн **2.** *обычно мн.* (*приспособления*) уңайлыҡ, ҡулайлыҡ; **кварти́ра со все́ми удо́бствами** бөтә уңайлыҡтары булған фатир

**УДОВЛЕТВОРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **удовлетвори́ть — удовлетворя́ть** 1, 3; **удовлетворе́ние зако́нных прав** хоҡуҡтарҙы ҡәнәғәтләндереү **2.** (*чувство*) ҡәнәғәтләнеү, ҡәнәғәтлек; **с больши́м удовлетворе́нием** ҙур ҡәнәғәтләнеү менән

**УДОВЛЕТВОРЁННОСТЬ** *ж* ҡәнәғәтләнгәнлек, ҡәнәғәтлек (тойғоһо), күңел тулылығы; **с чу́вством удовлетворённости** ҡәнәғәтлек тойғоһо менән

**УДОВЛЕТВОРЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **удовлетвори́ть** 1, 3; **2.** *прил.* ҡәнәғәт, ҡәнәғәтле; **удовлетворённый взгляд** ҡәнәғәт ҡараш; **быть удовлетворённым** ҡәнәғәт булыу

**УДОВЛЕТВОРИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ҡәнәғәт булыу, ҡәнәғәтлек, ҡәнәғәтләнерлек булыу(ы); **удовлетвори́тельность отве́та** яуаптың ҡәнәғәтләнерлек булыуы

**УДОВЛЕТВОРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡәнәғәтләндерерлек, ҡәнәғәтләнерлек; **удовлетвори́тельный отве́т** ҡәнәғәтләндерерлек яуап; **удовлетвори́тельные усло́вия** ҡәнәғәтләндерерлек шарттар

**УДОВЛЕТВОРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡәнәғәтләндереү, үтәү; (*утолить желание*) ҡандырыу; **удовлетвори́ть потре́бности населе́ния** халыҡ ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү; **удовлетвори́ть жа́жду** һыуһынды ҡандырыу; **удовлетвори́ть все жела́ния** бөтә теләктәрҙе үтәү **2.** *чему* ҡәнәғәтләндереү, тап (тура) килтереү, ярау, яуап биреү; **удовлетвори́ть всем тре́бованиям** бөтә талаптарға яуап биреү **3.** *кого-что, чем* тәьмин итеү; **удовлетвори́ть предприя́тия материа́лами** предприятиеларҙы материал менән тәьмин итеү

**УДОВЛЕТВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡәнәғәтләнеү, ҡәнәғәт булыу; **удовлетвори́ться разгово́ром** һөйләшеү менән ҡәнәғәт булыу

**УДОВЛЕТВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **удовлетвори́ть**

**УДОВЛЕТВОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удовлетвори́ться 2.** *страд. от* **удовлетворя́ть** 1, 3

**УДОВО́ЛЬСТВИЕ** *с* **1.** рәхәт(лек), хозурлыҡ, ләззәт; **доста́вить удово́льствие** рәхәтлек килтереү **2.** (*забава, развлечение*) күңел асыу, мәрәкә, уйын-көлкө; **ра́доваться ма́леньким удово́льствиям жи́зни** тормоштоң бәләкәй генә мәрәкәләренә ҡыуаныу ♦ **жить в своё удово́льствие** үҙ күңеленде күреп йәшәү

**УДОВО́ЛЬСТВОВАТЬСЯ** *сов. чем* ҡәнәғәт булыу, ҡәнәғәтләнеү, риза булыу

**УДО́Д** *м* һөҙһөт (*ҡош*)

**УДО́Й** *м* **1.** (*количество молока*) һауым; **су́точный удо́й** тәүлек һауым **2.** (*доение*) һауын; **у́тренний удо́й** иртәнге һауын; **вече́рний удо́й** киске һауын

**УДО́ЙНОСТЬ** *ж* **1.** һауым, һөтлөлөк, һөтлө булыу; **сте́пень удо́йности коро́в** һыйырҙарҙың һауым кимәле **2.** *см.* **удо́й** 1

**УДО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бер һауым ...ы, бер һауымдан алынған **2.** (*дающий много молока*) һөтлө, һауымлы; **удо́йная коро́ва** һөтлө һыйыр

**УДОРОЖА́ТЬ** *несов. см.* **удорожи́ть**

**УДОРОЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удорожи́ться 2.** *страд. от* **удорожа́ть**

**УДОРОЖИ́ТЬ** *сов. что* ҡиммәтләндереү, ҡыйбатландырыу, ҡиммәтләндерә (ҡыйбатландыра) барыу

**УДОРОЖИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡиммәтләнеү, ҡыйбатланыу

**УДОСТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **удосто́ить**

**УДОСТА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удосто́иться 2.** *страд. от* **удоста́ивать**

**УДОСТОВЕРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **удостове́рить** — **удостоверя́ть 2.** (*документ*) танытма, таныҡлыҡ; **удостовере́ние ли́чности** шәхес танытмаһы; **командиро́вочное удостовере́ние** командировка таныҡлығы

**УДОСТОВЕ́РИТЬ** *сов. что* раҫлау, дөрөҫләү, таныҡлау; **удостове́рить по́дпись** ҡултамғаны раҫлау

**УДОСТОВЕ́РИТЬСЯ** *сов. в чём* -ын/-ен күреү (аңлау), күреп (тикшереп) белеү, -ға/-гә ышаныу; **удостове́риться в пра́вильности сове́та** кәңәштең дөрөҫлөгөнә ышаныу

**УДОСТОВЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **удостове́рить**

**УДОСТОВЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **удостове́риться 2.** *страд. от* **удостоверя́ть**

**УДОСТО́ИТЬ** *сов. кого-что, чего* лайыҡ табыу (итеү, һанау), бүләкләү, биреү; **удосто́ить награ́ды** бүләккә лайыҡ итеү **2.** *чего, чем*; *часто ирон.* илтифатҡа лайыҡ тип табыу, лайыҡлы тип (итеп) һанау; **удосто́ить внима́нием** иғтибарға лайыҡ тип һанау; **удосто́ить дру́жбы** дуҫлыҡҡа лайыҡлы итеп һанау

**УДОСТО́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** *чего* лайыҡ булыу, бүләкләнеү; **удосто́иться высо́кой награ́ды** юғары бүләккә лайыҡ булыу **2.** *чего* и *с неопр.*; *часто ирон.* күреү (тойоу) бәхетенә ирешеү, эйә булыу; **удосто́иться внима́ния** иғтибарға эйә булыу

**УДОСУ́ЖИВАТЬСЯ** *несов. см.* **удосу́житься**

**УДОСУ́ЖИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ваҡыт табыу, форсат табыу (тейеү), ҡул(ы) тейеү; **удосу́житься зайти́ к дру́гу** дуҫҡа инеп сығырға ваҡыт табыу

**УДОЧЕРЕ́НИЕ** *с* ҡыҙлыҡҡа алыу

**УДОЧЕРИ́ТЬ** *сов. кого* ҡыҙлыҡҡа алыу, үҙеңә ҡыҙ итеү, (ҡыҙ баланы) аҫрауға (бағымға) алыу

**УДОЧЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **удочери́ть**

**УДОЧЕРЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **удочеря́ть**

**У́ДОЧКА** *ж* ҡармаҡ ♦ **заки́нуть у́дочку** *см.* **заки́нуть**; **пойма́ть (подцепи́ть) на у́дочку** ҡармаҡҡа ҡаптырыу, алдау; **попа́сться на у́дочку** ҡармаҡҡа (тоҙаҡҡа) эләгеү, алданыу

**УДРА́ТЬ** *сов.*; *разг.* ҡасыу, ҡасып китеү, тайыу, һыпыртыу, шылыу; **удра́ть с дежу́рства** дежурҙан ҡасып китеү

**УДРУЖИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* (*оказать дружескую услугу*) булышлыҡ итеү, ярҙам күрһәтеү, биреп тороу; **гото́в тебе́ удружи́ть** ярҙам күрһәтергә әҙер

**УДРУЧА́ТЬ** *несов. см.* **удручи́ть**

**УДРУЧА́ТЬСЯ** *несов. см.* **удручи́ться**

**УДРУЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **удручи́ть 2.** *прил.* (*крайне огорчённый*) төшөнкө, бойоҡ, борсоулы, хафалы, хәсрәтле; **удручённый вид** борсоулы ҡиәфәт; **быть удручённым** хафалы булыу

**УДРУЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* ныҡ борсоу, борсоуға һалыу, ҡайғыға һалыу, хәсрәткә төшөрөү, хафалау; **удручи́ть печа́льным сообще́нием** күңелһеҙ хәбәр менән борсоуға һалыу

**УДРУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* ныҡ борсолоу, борсоуға (хәсрәткә) ҡалыу (төшөү), хафаланыу

**УДУША́ТЬ** *несов. см.* **удуши́ть**

**УДУША́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **удуша́ть 2.** *прил. см.* **уду́шливый**

**УДУШИ́ТЬ** *сов. кого* быуыу, быуып үлтереү, тонсоҡтороу, тонсоҡтороп үлтереү

**УДУШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* **1.** (*повеситься*) аҫылыныу, быуылыу **2.** (*задохнуться*) быуылып (тонсоғоп) үлеү

**УДУ́ШЛИВОСТЬ** *ж* тонсоҡторғос булыу, бөркөүлек, тынсыулыҡ

**УДУ́ШЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*затрудняющий дыхание*) тынды ҡыҫа (бөтөрә) торған, тынсыу, бөркөү; **уду́шливый за́пах** тынды ҡыҫа торған еҫ **2.** (*вызывающий удушье*) тонсоҡторғос, тонсоҡтора торған; **уду́шливый газ** тонсоҡторғос газ

**УДУ́ШЬЕ** *с* тын бөтөү (ҡыҫылыу); **при́ступы уду́шья** тын ҡыҫылыу өйәнәге

**УДЭГЕ́** и **УДЭ́** *мн. нескл.* (*ед.* **удэге́** и **удэ́** *м* и *ж*) удэгейҙар, удэгей халҡы; *см.* **удэге́йцы**

**УДЭГЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое удэгей ...ы; **удэге́йский язы́к** удэгей теле

**УДЭГЕ́ЙЦЫ** *мн.* удэгейҙар, удэгей халҡы // *ед.* **удэге́ец** *м* удэгей ир-аты; **удэге́йка** *ж* удэгей ҡатын-ҡыҙы

**УЕДИНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **уедини́ть** – **уединя́ть, уедини́ться** – **уединя́ться** **2.** (*одиночество*) яңғыҙлыҡ, кеше менән ҡатнашмау (аралашмау); **жить в уедине́нии** кеше менән аралашмай йәшәү; **люби́ть уедине́ние** яңғыҙлыҡты яратыу

**УЕДИНЁННОСТЬ** *ж* аулаҡлыҡ, яңғыҙлыҡ; **уединённость ме́ста** урын аулаҡлығы; **люби́ть уединённость жи́зни** тормошта яңғыҙлыҡты яратыу

**УЕДИНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уедини́ть** **2.** *прил.* (*одиноко стоящий*) яңғыҙ, ситтә (айырым) торған; **уединённый дом** яңғыҙ йорт **3.** *прил.* (*безлюдный*) аулаҡ, кешеһеҙ; **уединённая у́лица** кешеһеҙ урам; **уединённый уголо́к са́да** баҡсаның аулаҡ урыны

**УЕДИНИ́ТЬ** *сов. кого-что* (*обособить*) үҙен генә ҡалдырыу, яңғыҙ (айырым) ҡалдырыу

**УЕДИНИ́ТЬСЯ** *сов.* (башҡаларҙан) айырымланыу, аулаҡ ҡалыу; **молодёжь уедини́лась** йәштәр башҡаларҙан айырымланды

**УЕДИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **уедини́ть**

**УЕДИНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уедини́ться** **2.** *страд. от* **уединя́ть**

**УЕ́ЗД** *м*; *ист.* өйәҙ (*революцияға тиклем Рәсәйҙә һәм 1929 й. тиклем СССР-ҙа административ-территориаль берәмек*)

**УЕ́ЗДНЫЙ,** -ая, -ое өйәҙ ...ы; **уе́здный го́род** өйәҙ ҡалаһы ♦ **уе́здное учи́лище** өйәҙ училищеһы (*революцияға тиклем Рәсәйҙә ике йыллыҡ училище*)

**УЕЗЖА́ТЬ** *несов. см.* **уе́хать**

**УЕ́ХАТЬ** *сов.* китеү, китеп барыу (*атҡа, машинаға һ.б. ултырып*)

**УЖ I** *м* туҙбаш, туҙбаш йылан ♦ **извива́ться (ползти́) ужо́м** ялағайланыу, эс-бауырға инеп барыу

**УЖ II** *нареч.* и *частица* **1.** *нареч. см.* **уже́** 1; **2.** *частица усил.* инде, уҡ, үк; **на вид не так уж и плох** ҡарамаҡҡа ул тиклем үк насар түгел

**УЖА́ЛИТЬ** *сов. см.* **жа́лить**; **его́ ужа́лила гадю́ка** уны ҡара йылан саҡты ♦ **как ужа́ленный** йылан (ҡорт) саҡҡандай (саҡҡан кеүек)

**УЖА́РИВАТЬ** *несов. см.* **ужа́рить**

**УЖА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ужа́риться** **2.** *страд. от* **ужа́ривать**

**УЖА́РИТЬ** *сов. что*; *разг.* ҡурып (ҡыҙҙырып) еткереү, булдырғанса (еткәнсә) ҡурыу (ҡыҙҙырыу)

**УЖА́РИТЬСЯ** *сов.* ҡурылып етеү, еткәнсә ҡыҙҙырылыу

**У́ЖАС** *м* **1.** ҡот алыныу, ҡот осоу; **его́ охвати́л у́жас** уның ҡото осто; **наводи́ть у́жас** ҡотон алыу **2.** *обычно мн.* **у́жасы** ҡот осҡос (ҡот осорғос) хәл (нәмә), дәһшәт; **у́жасы войны́** һуғыштың ҡот осҡос хәлдәре **3.** *чего* (*трагичность, безвыходность*) ҡурҡыныслыҡ, ҡот осорғослоҡ; **почу́вствовать у́жас положе́ния** хәлдең ҡот осорғослоғон тойоу **4.** *в знач. сказ.*; *разг.* иҫ китерлек, иҫ киткес, аҡылдан яҙырлыҡ; **здесь ведь про́сто у́жас** бында иҫ киткес бит **5.** *в знач. нареч.*; *разг.* харап, үтә, самаһыҙ, сикһеҙ; **у́жас как жа́рко** сикһеҙ эҫе ♦ **до у́жаса** *прост.* самаһыҙ, сикһеҙ

**УЖАСА́ТЬ** *несов. см.* **ужасну́ть**

**УЖАСА́ТЬСЯ** *несов. см.* **ужасну́ться**

**УЖА́СНО** **1.** *нареч.*; *разг.* (*скверно*) бик яман, бик насар, иҫ киткес, ҡот осҡос **2.** *нареч.*; *прост.* (*очень, чрезмерно*) бик, бик тә, үтә, ныҡ; **я ужа́сно рад** мин үтә шатмын; **ужа́сно уста́ть** бик ныҡ арыу **3.** *в знач. сказ.* бик яман, ҡот осҡос хәл; **э́то ужа́сно** был ҡот осҡос хәл

**УЖАСНУ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡотон алыу, ҡотон осороу, ныҡ ҡурҡытыу

**УЖАСНУ́ТЬСЯ** *сов.* ҡот алыныу, ҡот осоу, ныҡ ҡурҡыу

**УЖА́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*страшный*) ҡот осҡос, ҡот алынғыс, ҡурҡыныс, имәнес; **ужа́сный сон** ҡот осҡос төш **2.** *разг.* (*скверный, очень плохой*) ҡот осҡос, иҫ киткес, бик яман, бик насар; **ужа́сная пого́да** бик яман көн **3.** *разг.* (*чрезвычайный*) бик ныҡ, үтә, сиктән тыш; **ужа́сная боль** бик ныҡ ауыртыу **4.** (*очень тяжёлый, трагический*) дәһшәтле; **ужа́сное вре́мя** дәһшәтле заман

**УЖА́ТЬ** *сов. что* тарайтыу, ҡыҫыу, кәметеү

**УЖЕ́** *нареч.* и *частица* инде; **он уже́ до́ма** ул өйҙә инде; **уже́ ско́ро ве́чер** тиҙҙән кис етә инде; **он уже́ не молодо́й** ул йәш түгел инде; **уже́ тре́тьи су́тки идёт снег** өсөнсө көн инде ҡар яуа

**УЖЕ́НИЕ** *с см.* **уди́ть**

**УЖЕСТОЧА́ТЬ** *несов. см.* **ужесточи́ть**

**УЖЕСТОЧИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ҡатыландырыу; **ужесточи́ть тре́бования к наруши́телям дисципли́ны** тәртип боҙоусыларға талаптарҙы ҡатыландырыу

**УЖИВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **ужи́ться**

**УЖИ́ВЧИВОСТЬ** *ж* эйәләшеүсәнлек, һыйышып (тынышып) йәшәү; **ужи́вчивость хара́ктера** холоҡтоң эйәләшеүсәнлеге

**УЖИ́ВЧИВЫЙ,** -ая, -ое тынышып (һыйышып) йәшәүсән, эйәләшеүсән; **ужи́вчивый челове́к** эйәләшеүсән кеше

**УЖИМА́ТЬ** *несов. см.* **ужа́ть**

**УЖИ́МКИ** *мн.* (*ед.* **ужи́мка** *ж*) ҡылансыҡланыу, ҡыланыу, йөҙ йыйырыу, сирылыу; **говори́ть с ужи́мками** ҡылансыҡланып һөйләү

**У́ЖИН** *м* киске аш, кискелек; **за у́жином** киске аш ашағанда

**У́ЖИНАТЬ** *несов.* киске аш ашау, кискелекте ашау

**УЖИ́НЫЙ,** -ая, -ое туҙбаш (туҙбаш йылан) ...ы

**УЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*привыкнуть*) ылығыу, эйәләшеү, кешегә өйрәнеү; **ужи́ться в дере́вне** ауылға эйәләшеү **2.** *с кем* татыу (дуҫ, тыныштып) йәшәү; **не ужи́ться с сосе́дями** күршеләр менән тыныша алмау **3.** *перен.* (*сочетаться*) һыйышыу, күтәрә алыу

**УЖО́** *нареч.*; *прост.* **1.** (*позже*) берәй ваҡыт, аҙаҡ **2.** *в знач. межд.* ҡара уны, бына һиңә (һеҙгә) (*янау мәғәнәһендә*); **ужо́ посто́й!** бына һиңә, көтөп тор!

**УЖО́ВЫЙ,** -ая, -ое туҙбаш (туҙбаш йылан) ...ы; **ужо́вая голова́** туҙбаш йылан башы

**У́ЗА** и **УЗА́** *ж*; *пчел.* (*прополис*) бал ҡорто елеме

**УЗАКОНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **узако́нить 2.** *уст.* ҡанун, закон, ҡарар

**УЗАКО́НЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **узако́нить 2.** *прил.* ҡанунлашҡан, законлашҡан, ҡарар көсөнә ингән; **узако́ненный распоря́док дня** ҡанунлашҡан көн тәртибе

**УЗАКО́НИВАТЬ** *несов. см.* **узако́нить**

**УЗАКО́НИТЬ** *сов. что* **1.** (*придать законную силу*) законлаштырыу, закон көсөнә индереү, законлы итеү; **узако́нить насле́дство** мираҫты законлаштырыу **2.** (*признать правильным*) дөрөҫләү, (дөрөҫ тип) таныу

**УЗБЕ́КИ** *мн.* үзбәктәр, үзбәк халҡы // *ед.* **узбе́к** *м* үзбәк ир-аты; **узбе́чка** *ж* үзбәк ҡатын-ҡыҙы

**УЗБЕ́КСКИЙ,** -ая, -ое үзбәк ...ы; **узбе́кский язы́к** үзбәк теле

**УЗДА́** и **УЗДЕ́ЧКА** *ж* йүгән ♦ **держа́ть в узде́** *кого-что* ауыҙлыҡлап тотоу

**УЗДЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое йүгән ...ы; **узде́чные удила́** йүгән ауыҙлыҡтары

**УЗДЦЫ́: под уздцы́ (взять, держа́ть)** йүгәненән (ауыҙлығынан) йөрөтөү (тотоу)

**У́ЗЕЛ I** *м* **1.** төйөн, тоҡан; **двойно́й у́зел** ике ҡатлы төйөн **2.** төйөнсөк, төргәк; **у́зел с веща́ми** әйбер(ҙәр) төргәге **3.** (*в организме, растениях*) төйөр, биҙ, быуын; **не́рвный у́зел** нервы төйөрө; **лимфати́ческий у́зел** лимфатик биҙ **4.** үҙәк; **железнодоро́жный у́зел** тимер юл үҙәге; **у́зел свя́зи** элемтә үҙәге **5.** *тех.* быуын; **сбо́рка узло́в маши́ны** машинаның быуындарын йыйыу ♦ **го́рдиев у́зел**; **рассе́чь (разруби́ть) го́рдиев у́зел** *см.* **го́рдиев**; **морско́й у́зел** караптағы тростарҙы (бауҙарҙы) төйнәү төрҙәре

**У́ЗЕЛ II** *м*; *мор.* узел (*караптарҙың диңгеҙҙә йөҙөү тиҙлеген үлсәү берәмеге*)

**У́ЗИТЬ** *несов.*; *разг.* тарайтыу, нәҙегәйтеү

**У́ЗИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* тарайыу, нәҙегәйеү

**У́ЗКИЙ,** -ая, -ое **1.** тар, ҡыҫан, ҡыҫыҡ; **у́зкая у́лица** тар урам; **у́зкое ме́сто** ҡыҫан ер; **у́зкие глаза́** ҡыҫыҡ күҙ **2.** (*тесный*) тар, ҡыҫтау, ҡыҫыҡ, тығыҙ; **у́зкое пла́тье** тар күлдәк; **у́зкая о́бувь** тығыҙ аяҡ кейеме **3.** *перен.* (*ограниченный*) тар, сикләнгән, бәләкәй, аҙ; **у́зкий круг знако́мых** таныштарҙың сикләнгән даирәһе; **у́зкое совеща́ние** аҙ кешеле кәңәшмә **4.** *перен.* (*недалёкий*) тар ҡарашлы; **у́зкий кругозо́р** тар ҡарашлы аң даирәһе **5.** *лингв.* тар, тар әйтелешле; **у́зкий гла́сный** тар әйтелешле һуҙынҡы ♦ **у́зкое ме́сто** *в чём* йомшаҡ ер (урын)

**УЗКО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "тар", "нәҙек", "ҡыҫыҡ", "оҙонса" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **узкогру́дый** тар күкрәкле; **узколи́цый** оҙонса битле

**УЗКОВЕ́ДОМСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое тар ведомствосылыҡ ...ы; **соблюда́ть узкове́домственные интере́сы** тар ведомствосылыҡ мәнфәғәттәрен һаҡлау

**УЗКОГЛА́ЗИЕ** *с* ҡыҫыҡ күҙлелек

**УЗКОГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫыҡ күҙле

**УЗКОГО́РЛЫЙ,** -ая, -ое тар муйынлы, тар ауыҙлы; **узкого́рлый горшо́к** тар муйынлы көршәк

**УЗКОКОЛЕ́ЙКА** *ж*; *разг.* узкоколейка, тар колеялы тимер юл

**УЗКОКОЛЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое тар колеялы; **узкоколе́йная желе́зная доро́га** тар колеялы тимер юл

**УЗКОЛИ́СТНЫЙ** и **УЗКОЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое тар япраҡлы; **узколи́стая ряби́на** тар япраҡлы миләш

**УЗКОЛО́БИЕ** *с* тар ҡарашлылыҡ

**УЗКОЛО́БЫЙ,** -ая, -ое **1.** тар маңлайлы **2.** *перен.*, *разг.* тар ҡарашлы, сикләнгән (тоҡон) ҡарашлы; **узколо́бый челове́к** тар ҡарашлы кеше

**УЗКОНО́СЫЙ,** -ая, -ое **1.** тар моронло, оҙон (осло) моронло; **узконо́сый ча́йник** тар моронло сәйнүк; **узконо́сая ло́дка** оҙон моронло кәмә **2.** *разг.* (*об обуви и т.п.*) осло башлы; **узконо́сые ту́фли** осло башлы туфли

**УЗКОПЛЁНОЧНЫЙ,** -ая, -ое тар плёнкалы; **узкоплёночный киноаппара́т** тар плёнкалы киноаппарат

**УЗКОПЛЕ́ЧИЙ,** -ая, -ее тар яурынлы, тар иңһәле; **узкопле́чий челове́к** тар яурынлы кеше

**УЗКОРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое тар рәтле; **узкоря́дный посе́в** тар рәтле сәсеү; **узкоря́дная се́ялка** тар рәтле сәскес

**УЗКОСПЕЦИАЛИЗИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое тар махсуслаштырылған; **узкоспециализи́рованное хозя́йство** тар махсуслаштырылған хужалыҡ

**УЗКОСПЕЦИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тар махсуслашҡан; **узкоспециа́льная о́трасль нау́ки** фәндең тар махсуслашҡан тармағы

**У́ЗКОСТЬ** *ж* **1.** *разг.*, *уст.* тарлыҡ; **у́зкость у́лиц** урамдарҙың тарлығы; **у́зкость мировоззре́ния** донъяға ҡараш тарлығы **2.** фарватерҙың тар өлөшө (ере)

**УЗЛОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** төйөрлө, өбөрөлө; **узлова́тая пря́жа** төйөрлө еп **2.** (*искривлённый, с наростами — о стволе, ветвях, корнях деревьев*) суғырмаҡлы, ороло, суғырмаҡ (оро) ҡапланған; **узлова́тый ствол ду́ба** имәндең суғырмаҡлы олоно **3.** (*с утолщениями, припухлостями — о су-*



18 зак. 2.0007.06

*ставах, венах*) төйөрлө, сурайып торған, төйөрлө, бирсәйгән; **узлова́тые суста́вы** төйөрлө быуын; **узлова́тые па́льцы** сурайып торған бармаҡтар

**УЗЛОВО́Й,** -ая, -ое **1.** үҙәк; **узлова́я железнодоро́жная ста́нция** үҙәк тимер юл станцияһы; **узлово́е направле́ние** үҙәк йүнәлеш **2.** *перен.* төп, иң мөһим, иң әһәмиәтле; **узлово́й вопро́с** төп мәсьәлә **3.** быуынлы, өлөшлө, быуынлы-быуынлы; **узлово́й ремо́нт** быуынлы-быуынлы ремонт; **узлова́я сбо́рка** быуынлап йыйнау ♦ **узлово́е письмо́** төйөнлө яҙыу (*ҡайһы бер яҙмаһыҙ халыҡтарҙың иҫәп-хисап өсөн бауҙы төйөнләүе*)

**УЗНАВА́ТЬ** *несов. см.* **узна́ть**

**УЗНАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **узна́ться 2.** *страд. от* **узнава́ть**

**УЗНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* таныу, танып алыу; **узна́ть ста́рого дру́га** иҫке дуҫты таныу **2.** *что* белеү, белешеү, һорашып (ишетеп) белеү; **узна́ть от бра́та ве́сти** ағайҙан хәбәрҙәр ишетеп белеү; **узна́ть но́вости** яңылыҡтарҙы һорашып белеү **3.** кисереү, татыу; **узна́ть ра́дость матери́нства** әсә булыу шатлығын татыу ♦ **свои́х не узна́ет (не узна́ешь)** кәрәген биреү

**УЗНА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* беленеү, билдәле булыу; **всё узна́ется пото́м** бөтәһе лә һуңынан беленер

**У́ЗНИК** *м* и **У́ЗНИЦА** *ж* тотҡон, әсир

**УЗО́Р** *м* биҙәк, семәр, ҡузыр, нағыш; **узо́р на нали́чниках** тәҙрә ҡашының йөҙлөк семәре; **узо́р платка́** яулыҡ биҙәге

**УЗО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** биҙәк ...ы, семәр ...ы, биҙәкләй (семәрләй) торған; **узо́рные образцы́** биҙәк үрнәктәре **2.** *см.* **узо́рчатый**

**УЗО́РЧАТОСТЬ** *ж* биҙәклелек, семәрлелек, биҙәкле (семәрле) булыу

**УЗО́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое биҙәкле, семәрле, ҡузырлы, нағышлы; **узо́рчатая ткань** биҙәкле туҡыма; **узо́рчатый по́яс** семәрле билбау

**У́ЗОСТЬ** *ж* **1.** тарлыҡ, ҡыҫырыҡлыҡ, ҡыҫанлыҡ; **у́зость у́лицы** урамдың тарлығы **2.** *перен.* (*ограниченность*) сикләнгәнлек, тарлыҡ, тар ҡарашлылыҡ; **у́зость тема́тики** теманың сикләнгәнлеге

**УЗРЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*увидеть*) күреү, аңлау **2.** *книжн.* (*заподозрить*) тип аңлау (күреү), тип ҡабул итеү; **узре́ть оби́ду** үпкәләрлек тип аңлау

**УЗУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *юр.* ғәҙәттә булған, йолаға таянған **2.** *лингв.* узуаль, ғәҙәти, ҡабул ителгән; **узуа́льное значе́ние** ҡабул ителгән мәғәнә

**УЗУРПА́ТОР** *м*; *книжн.* узурпатор (*власты йәки кешеләрҙең хоҡуҡтарын законһыҙ рәүештә үҙ ҡулына алған кеше*)

**УЗУРПА́ТОРСТВО** *с*; *книжн.* узурпаторлыҡ

**УЗУРПА́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* узурпация (*власты йәки кеше хоҡуҡтарын законһыҙ тартып алыу*)

**УЗУРПИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что*; *книжн.* узурпациялау (*законһыҙ тартып алыу*)

**У́ЗУС** *м* **1.** *юр.* (*обычай*) йола, ғәҙәт **2.** *лингв.* узус (*һүҙҙең йәки әйтемдең дөйөм ҡабул ителгән ҡулланылышы*)

**У́ЗЫ** *только мн.* **1.** *уст.* (*оковы*) бығау, тышау **2.** *чего, какие*; *перен.* бәйләнеш, еп; **семе́йные у́зы** ғаилә бәйләнештәре; **у́зы дру́жбы** дуҫлыҡептәре ♦ **кро́вные у́зы**; **у́зы кро́ви** *см.* **кро́вный**

**УЙГУ́РСКИЙ,** -ая, -ое уйғыр ...ы; **уйгу́рский язы́к** уйғыр теле

**УЙГУ́РЫ** *мн.* уйғырҙар, уйғыр халҡы // *ед.* **уйгу́р** *м* уйғыр ир-аты; **уйгу́рка** *ж* уйғыр ҡатын-ҡыҙы

**У́ЙМА** *ж*; *разг.* бик күп, әллә ни саҡлы, хисапһыҙ күп, бөтҡөһөҙ күп; **у́йма де́нег** бик күп аҡса, хисапһыҙ күп аҡса; **у́йма наро́ду** әллә ни саҡлы халыҡ

**УЙТИ́** *сов.* **1.** *прям.*, *перен.* китеү, сығып китеү; **уйти́ на рабо́ту** эшкә китеү; **уйти́ на охо́ту** һунарға сығып китеү; **письмо́ ушло́ с у́тренней по́чтой** хат иртәнге почта менән китте; **уйти́ от прямо́го отве́та** тура яуаптан ситкә китеү **2.** *разг.* (*уволиться*) сығыу, ташлау, китеү; **уйти́ с рабо́ты** эштән китеү; **уйти́ на пе́нсию** пенсияға сығыу **3.** *прям.*, *перен.* (*спастись*) ҡасыу, ҡасып ҡотолоу; **уйти́ от пресле́дования** эҙәрләүҙән ҡасыу; **от судьбы́ не уйти́** яҙмыштан ҡасып ҡотолоп булмай **4.** *перен.* үтеү, уҙыу, үтеп китеү; **вре́мя уже́ ушло́** ваҡыт үтеп китте инде; **мо́лодость ушла́** йәшлек уҙҙы **5.** *на что* китеү, тотолоу, тотолоп бөтөү; **де́ньги ушли́ на поку́пку костю́ма** аҡса костюм алыуға китте; **на пла́тье ушло́ четы́ре ме́тра** күлдәккә дүрт метр китте **6.** *во что* батыу, инеп китеү; **колёса маши́ны наполови́ну ушли́ в грунт** машинаның тәгәрмәстәре яртылай ергә батты **7.** *перен.* сумыу, күмелеү, батыу; **с голово́й уйти́ в рабо́ту** баш менән эшкә сумыу **8.** *разг.* (*вытечь*) ташыу, ташып китеү (сығыу, түгелеү); **молоко́ ушло́** һөт ташып китте **9.** (*со словами "вперёд", "далеко"*) (алға) китеү, (алға) сығыу; **часы́ ушли́ вперёд** сәғәт алға киткән; **уйти́ вперёд в учёбе** уҡыуҙа алға китеү ♦ **уйти́ в кусты́** *см.* **куст**; **уйти́ в мир ино́й** теге донъяға китеү; **уйти́ в себя́** кешенән ситләшеү, үҙеңә бикләнеү; **уйти́ из жи́зни** донъянан китеү, донъя ҡуйыу; **уйти́ на дно** һыу төбөнә китеү, батыу; **уйти́ на поко́й** ялға сығыу, эштән китеү; **не уйдёт** *кто-что* ҡасмаҫ, китмәҫ; **душа́ ушла́ в пя́тки** *см.* **душа́**; **уйти́ ни с чем** ҡоро китеү (ҡалыу), буш (бер нигеҙ) китеү

**УКА́З** *м* **1.** ҡарар, указ; **Ука́з Президе́нта РФ** РФ Президентының ҡарары **2.** *в знач. сказ. кому*; *разг.* үрнәк, күрһәтмә, өлгө; **он мне не ука́з** ул миңә өлгө түгел

**УКАЗА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **указа́ть 2.** (*наставление*) күрһәтмә; **дать указа́ние** күрһәтмә биреү

**УКАЗА́ТЕЛЬ** *м* **1.** күрһәткес; **указа́тель доро́г** юл күрһәткес; **указа́тель ско́рости** тиҙлек күрһәткес **2.** (*справочник*) белешмә, белешмәлек,

күрһәткес; **железнодоро́жный указа́тель** тимер юл белешмәһе; **библиографи́ческий указа́тель** библиографик белешмә; **указа́тель имён** исемдәр күрһәткесе

**УКАЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күрһәтеү ...ы, күрһәткес, күрһәтә торған; **указа́тельная стре́лка** күрһәткес уҡ; **указа́тельное местоиме́ние** *грам.* күрһәтеү алмашы ♦ **указа́тельный па́лец** һуҡ (һуп) бармаҡ, имән бармаҡ

**УКАЗА́ТЬ** *сов.* **1.** *на кого-что* күрһәтеү, төртөп күрһәтеү; **указа́ть па́льцем** бармаҡ менән төртөп күрһәтеү; **указа́ть на недоста́тки в рабо́те** эштәге етешһеҙлектәрҙе күрһәтеү **2.** *что* билдәләү, күрһәтеү; **указа́ть срок упла́ты до́лга** бурысты түләү ваҡытын билдәләү; **указа́ть обра́тный а́дрес в письме́** хатта кире ебәреү адреһын күрһәтеү **3.** *кого-что, на кого-что; перен.* (*предложить*) аңлатыу, өйрәтеү, тәҡдим итеү; **указа́ть вы́ход из тру́дного положе́ния** ауыр хәлдән сығыу юлын аңлатыу ♦ **указа́ть на дверь** *см.* **дверь**

**УКА́ЗКА** *ж* **1.** (*палочка*) күрһәткес, күрһәткес таяҡ **2.** *разг.* (*распоряжение*) ҡушыу, күрһәтеү; **де́лать по чужо́й ука́зке** кеше ҡушыуы буйынса эшләү ♦ **не ука́зка** *кому; в знач. сказ. см.* **ука́з** 2

**УКА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡарар(ҙар) ...ы, указ(дар) ...ы; **ука́зная кни́га** ҡарарҙар китабы **2.** *уст.* указлы (*закон буйынса тәғәйенләнгән*); **ука́зный мулла́** указлы мулла

**УКА́ЗЧИК** *м* и **УКА́ЗЧИЦА** *ж*; *разг.* өйрәтеүсе, күрһәтмә биреүсе

**УКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **указа́ть**

**УКА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **уколо́ть**

**УКА́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уколо́ться** **2.** *страд. от* **ука́лывать**

**УКАРАУ́ЛИТЬ** *сов. кого-что; разг.* ҡарауыллап тороу, күҙәтеп (һағалап) ҡалыу (тороу); **укарау́лить ве́щи** әйберҙәрҙе ҡарауыллап тороу; **укарау́лить моме́нт** мәлен һағалап тороу

**УКА́ТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уката́ть** **2.** *прил.* (*ставший гладким*) таҡыр, шыма, таҡырайған, шымарған; **ука́танная доро́га** таҡыр юл **3.** *прил.* (*уплотнённый*) тығыҙланған, тығыҙ (ҡаты, ныҡ) баҫылған (баҫҡан), ҡатҡан; **ука́танный снег** тығыҙланған ҡар

**УКАТА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* таҡырайтыу, шымартыу, таҡырайтып бөтөү (бөтөрөү), шымартып бөтөү (бөтөрөү); **уката́ть са́нную доро́гу** сана юлын шымартыу **2.** *что* (*уплотнить*) баҫыу, тығыҙлау; **уката́ть кошму́** кейеҙҙе тығыҙлап баҫыу **3.** *кого; прост.* (*измучить работой, побоями*) йонсотоу, бөтөрөү ♦ **уката́ли си́вку круты́е го́рки** бөтөрҙө күксәйҙе бейек үрҙәр

**УКАТА́ТЬСЯ** *сов.* тығыҙланыу, таҡырайыу, тигеҙләнеү, шымарыу; **доро́ги уката́лись** юлдар таҡырайҙы

**УКАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тәгәр(л)әтеп алып китеү, тәгәр(л)әтеп ебәреү **2.** *разг.* (*уехать куда-л. без промедления*) китеү, китеп барыу; **укати́ть за грани́цу** сит илгә китеп барыу

**УКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тәгәр(л)әп китеү, тәгәр(л)әп инеп китеү; **мяч укати́лся под шкаф** туп шкаф аҫтына тәгәрләп инеп китте **2.** *см.* **укати́ть** 2

**УКА́ТЫВАТЬ I** *несов. см.* **уката́ть** 1, 2

**УКА́ТЫВАТЬ II** *несов. см.* **укати́ть** 1

**УКА́ТЫВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **уката́ться** **2.** *страд. от* **ука́тывать** I

**УКА́ТЫВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **укати́ться** **2.** *страд. от* **ука́тывать** II

**У́КАТЬ** *несов.* ухылдау (*ҡайһы бер ҡоштар тауышы*); **у́кает выпь** мөншөгәр ухылдай

**УКАЧА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*убаюкать*) бәүетеү, бәүетеп йоҡлатыу **2.** *обычно безл.* (тирбәлеүҙән) баш әйләнеү, (бәүелеүҙән) күңел болғаныу

**УКАЧА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (бәүелеүҙән) күңел болғаныу

**УКА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **укача́ть**

**УКА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **укача́ться** **2.** *страд. от* **ука́чивать**

**УКА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **укоси́ть**

**УКВА́СИТЬ** *сов.*; *разг.* әсетеп еткереү, еткәнсә әсетеү; **ква́сить капу́сту** кәбеҫтәне әсетеп еткереү

**УКВА́СИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* әсеп етеү, еткәнсә әсеү, тулыһынса әсеү

**УКВА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **уква́сить**

**УКВА́ШИВАТЬСЯ** *несов. см.* **уква́ситься**

**УКИПА́ТЬ** *несов. см.* **укипе́ть**

**УКИПЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** ҡайнап кәмеү **2.** (*дойти до готовности*) бешеп (ҡайнап) етеү

**УКИСА́ТЬ** *несов. см.* **уки́снуть**

**УКИ́СНУТЬ** *сов.*; *разг.* әсеп етеү (әҙер булыу, өлгөрөү); **квас уки́с** кеүәҫ әсеп еткән

**УКЛА́Д** *м* **1.** тәртип, йәшәү рәүеше; **укла́д жи́зни** тормош тәртибе **2.** *эк.* хужалыҡ тәртибе (рәүеше); **капиталисти́ческий укла́д** капиталистик хужалыҡ рәүеше

**УКЛА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **укла́дывать** 2, 3; **2.** (*то, что уложено*) өйөм; **укла́дка распи́ленных дров** бысылған утын өйөмө **3.** (*вид причёски*) сәсте рәтләү; **сде́лать укла́дку** сәсте рәткә килтереү

**УКЛА́ДЧИК** *м* и **УКЛА́ДЧИЦА** *ж* һалыусы, түшәүсе (*эшсе*); **укла́дчик парке́та** паркет түшәүсе

**УКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **уложи́ть** 1—4, 6

**УКЛА́ДЫВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **уложи́ться** **2.** *страд. от* **укла́дывать**

**УКЛА́ДЫВАТЬСЯ II** *несов. см.* **уле́чься** 1—3

**УКЛЕ́ЙКА** *ж* аҡ сабаҡ (*балыҡ*)

**УКЛО́Н** *м* **1.** һарҡыу, һарҡыулыҡ, ауышлыҡ, иңкеүлек; **е́хать по укло́ну** һарҡыулыҡтан төшөү **2.** *перен.* йүнәлеш; **шко́ла с математи́ческим укло́ном** математик йүнәлешле мәктәп **3.** *перен.* (*в политике*) тайпылыш; **ле́вый укло́н** һул тайпылыш; **пра́вый укло́н** уң тайпылыш

**УКЛОНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *от кого-чего* и *без доп.* тайпылыу, тайшаныу, янтайыу; **уклони́ться**

**от уда́ра** һуғыуҙан янтайып ҡалыу **2.** боролоу, ситкә боролоу; **доро́га уклони́лась впра́во** юл уңға боролдо **3.** *от чего*; *перен.* ситләшеү, ситкә китеү (сығыу), ситләшеп китеү; **ора́тор уклони́лся от те́мы** оратор теманан ситләшеп китте **4.** *от чего*; *перен.* ҡасыу, ситләшеү, баш тартыу; **уклони́ться от отве́та** яуап биреүҙән ҡасыу

**УКЛО́НЧИВОСТЬ** *ж* икеләнеүсәнлек, икеле-микеле булыу, аумаҡайлыҡ

**УКЛО́НЧИВЫЙ,** -ая, -ое аумаҡай, икеле-микеле, тайшаныусан; **укло́нчивый отве́т** икеле-микеле яуап

**УКЛОНЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **уклони́ться**

**УКЛЮ́ЧИНА** *ж* ишкәк кендеге (сөйө), кәмә ҡолағы

**УКОКО́ШИТЬ** *сов.*; *прост.* башын яра һуғыу, һуғып үлтереү

**УКО́Л** *м* **1.** *см.* **уколо́ть** — **ука́лывать** 1, **уколо́ться** — **ука́лываться 2.** *мед.* укол, ҡаҙау **3.** *перен.* төрттөрөү, сәнсеү, сәнскеле һүҙ әйтеү, рәнйетеү

**УКОЛО́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** сәнсеү, төрттөрөү, сәнсеп алыу **2.** *перен.* (*обидеть, задеть*) сәнскеле һүҙ әйтеү, сәнсеү, рәнйетеү

**УКОЛО́ТЬСЯ** *сов.* сәнселеү, ҡаҙалыу; **уколо́ться иго́лкой** энәгә сәнселеү

**УКОМПЛЕКТОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** комплектлау, комплект төҙөү; **укомплектова́ть журна́лы** журналдарҙы комплектлау **2.** туплау, комплектлаштырыу; **укомплектова́ть библиоте́ку** китапхананы комплектлаштырыу

**УКОМПЛЕКТОВА́ТЬСЯ** *сов.* комплектланыу, тулыланыу, тейешле һанға етеү

**УКОМПЛЕКТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **укомплектова́ть**

**УКОМПЛЕКТО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **укомплектова́ться 2.** *страд. от* **укомплекто́вывать**

**УКО́Р** *м* үпкә, шелтә, әр, орошоу; **уко́р во взгля́де** ҡарашындағы шелтә ♦ **ста́вить в уко́р** *кому, что* шелтә белдереү, шелтәләү; **уко́ры со́вести** намыҫ ғазабы

**УКОРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **укороти́ть**

**УКОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **укороти́ться 2.** *страд. от* **укора́чивать**

**УКОРЕНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** тамырландырыу, тамыр йәйҙереү **2.** *перен.* (*внедрить*) нығытыу, һеңдереү, ғәҙәткә индереү

**УКОРЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*укрепиться корнями*) тамырланыу, тамыр ебәреү (йәйеү) **2.** *перен.* (*войти в обычай*) төпләнеү, тамырланыу, нығыныу, ныҡлы урын алыу, ғәҙәткә инеү

**УКОРЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **укорени́ть**

**УКОРЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **укорени́ться 2.** *страд. от* **укореня́ть**

**УКОРИ́ЗНА** *ж см.* **уко́р**

**УКОРИ́ЗНЕННЫЙ,** -ая, -ое шелтәле; **укори́зненный взгляд** шелтәле ҡараш

**УКОРИ́ТЬ** *сов. кого-что* шелтәләү, орошоу, ризаһыҙлыҡ (асыу) белдереү; **укори́ть за опозда́ние** һуңлап килеү өсөн шелтәләү

**УКОРОТИ́ТЬ** *сов. что* ҡыҫҡартыу, ҡыҫҡарта төшөү; **укороти́ть во́лосы** сәсте ҡыҫҡартыу; **укороти́ть жизнь** ғүмерҙе ҡыҫҡартыу ♦ **укороти́ть ру́ки** *кому* ҡулын ҡыҫҡартыу (*һуғышҡан кешегә ҡарата*); **укороти́ть язы́к** *кому*; *прост.* телен ҡыҫҡартыу

**УКОРОТИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡыҫҡарыу; **костю́м укороти́лся** костюм ҡыҫҡарған; **дни укороти́лись** көндәр ҡыҫҡарҙы

**УКОРО́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **укороти́ть 2.** *прил.* ҡыҫҡартылған, ҡыҫҡарған, ҡыҫҡа; **укоро́ченное пла́тье** ҡыҫҡартылған күлдәк; **укоро́ченный рабо́чий день** ҡыҫҡа эш көнө

**УКОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **укори́ть**

**УКОРЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **укоря́ть 2.** *прил.* шелтәле; **укоря́ющий взгляд** шелтәле ҡараш

**УКО́С** *м*; *с.-х.* **1.** *см.* **укоси́ть 2.** (*количество скошенной травы*) сабым, (сабылған) бесән; **дневно́й уко́с** бер көнлөк бесән

**УКОСИ́ТЬ** *сов. что*; *прост.* сабып бөтөрөү (сығыу, ташлау); **укоси́ть весь луг** болондо сабып сығыу

**УКО́СНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* сабыла торған, сабырға тәғәйенләнгән, сабынлыҡ ...ы; **уко́сная пло́щадь** сабыла торған майҙан

**УКРА́ДКОЙ** *нареч.* йәшертен, һиҙҙермәй(енсә), аҫтыртын, аҫтан ғына; **взгляну́ть укра́дкой** йәшертен ҡарап алыу

**УКРАИ́НСКИЙ** и *уст.* **УКРА́ИНСКИЙ,** -ая, -ое украин ...ы, Украина ...ы; **украи́нский наро́д** украин халҡы; **укра́инский язы́к** украин теле

**УКРАИ́НЦЫ** и *уст.* **УКРА́ИНЦЫ** *мн.* украиндар, украин халҡы // *ед.* **украи́нец** *м* украин ир-аты; **украи́нка** *ж* украин ҡатын-ҡыҙы

**УКРА́СИТЬ** *сов.*; *прям.*, *перен.* (*кого*) биҙәү, матурлау, йәмләү, матурайтыу; (*что*) биҙәү, биҙәкләү, матурлау, матурайтыу, йәмләү, йәмләндереү; **укра́сить ёлку** ыршыны биҙәү; **укра́сить жизнь** тормошто йәмләү; **любо́вь украша́ет челове́ка** мөхәббәт кешене матурлай

**УКРА́СИТЬСЯ** *сов. чем* биҙәнеү, биҙәлеү, йәмләнеү, матурланыу; **пло́щадь укра́силась фла́гами** майҙан флагтар менән биҙәлде

**УКРА́СТЬ** *сов. кого-что* урлау, урлап алып китеү

**УКРАША́ТЕЛЬСТВО** *с* биҙәкләү, биҙәкләүсәнлек (*саманан тыш матурлау*)

**УКРАША́ТЬ** *несов. см.* **укра́сить**

**УКРАША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **укра́ситься 2.** *страд. от* **украша́ть**

**УКРАШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **укра́сить** — **украша́ть 2.** (*предмет*) биҙәүес (*матурлау әйбере*); **ёлочные украше́ния** ыршы биҙәүестәре; **драгоце́нные украше́ния** ҡиммәтле биҙәүестәр; **резны́е**

**украше́ния** һырлап эшләнгән биҙәүестәр **3.** *чего* күрк, зиннәтлек, биҙәк; **тала́нтливый челове́к — украше́ние о́бщества** талантлы кеше — йәмғиәттең күрке

**УКРЕПИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое нығытма ...ы; **укрепи́тельное сооруже́ние** нығытма ҡорамалы

**УКРЕПИ́ТЬ** *сов* **1.** *что* нығытыу; **укрепи́ть ста́рый мост** иҫке күперҙе нығытыу; **укрепи́ть семью́** ғаиләне нығытыу; **укрепи́ть здоро́вье** һаулыҡты нығытыу; **укрепи́ть дисципли́ну** тәртипте нығытыу **2.** *что*; *воен.* нығытыу, көсәйтеү, ҡеүәтләндереү; **укрепи́ть а́рмию** армияны нығытыу

**УКРЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать более прочным, сильным*) нығыу, нығыныу, көсәйеү, яҡшырыу; **дисципли́на укрепи́лась** тәртип яҡшырҙы; **здоро́вье его́ укрепи́лось** уның һаулығы нығынды **2.** *воен.* нығытмалар ҡороу, нығып урынлашыу, нығыныу; **полк укрепи́лся на пози́ции** полк позицияла нығынды

**УКРЕПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **укрепи́ть — укрепля́ть, укрепи́ться — укрепля́ться 2.** *воен.* нығытма; **берегово́е укрепле́ние** яр буйы нығытмаһы; **ли́ния укрепле́ний** нығытмалар һыҙығы

**УКРЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **укрепи́ть**

**УКРЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **укрепи́ться 2.** *страд. от* **укрепля́ть**

**УКРЕПЛЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **укрепля́ть 2.** *прил.* көсләләндереүсе, нығындырыусы; **укрепля́ющее сре́дство** нығындырыусы сара

**УКРО́МНЫЙ,** -ая, -ое аулаҡ, ышыҡ, тыныс; **укро́мное ме́сто** аулаҡ урын

**УКРО́П** *м* укроп; **посе́ять укро́п** укроп сәсеү

**УКРО́ПНЫЙ,** -ая, -ое укроп ...ы; **укро́пный за́пах** укроп еҫе

**УКРОТИ́ТЕЛЬ** *м* и **УКРОТИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* ҡулға эйәләштереүсе, ҡулға өйрәтеүсе (*ҡырағай хайуандарҙы*)

**УКРОТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* эйәләштереү, ҡулға өйрәтеү, үҙенә буйһондороу; **укроти́ть ти́гра** юлбарысты ҡулға өйрәтеү **2.** теләккә (тойғоға) ирек бирмәү, тыйыу, баҫыу; **укроти́ть гнев** асыуҙы баҫыу

**УКРОТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*усмириться*) ҡулға өйрәнеү, эйәләшеү, буйһоноу **2.** *прям., перен.* баҫылыу, тыйылыу, тыныу; **гнев укроти́лся** асыу баҫылды

**УКРОЩА́ТЬ** *несов. см.* **укроти́ть**

**УКРОЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **укроти́ться 2.** *страд. от* **укроща́ть**

**УКРОЩЕ́НИЕ** *с см.* **укроти́ть — укроща́ть**

**УКРУПНЕ́НИЕ** *с см.* **укрупни́ть — укрупня́ть, укрупни́ться — укрупня́ться; укрупне́ние министе́рств** министрлыҡтарҙы эреләтеү

**УКРУПНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **укрупни́ть 2.** *прил.* ҙурайтылған, эреләтелгән; **укрупнённые хозя́йства** эреләтелгән хужалыҡтар

**УКРУПНИ́ТЬ** *сов. что* эреләтеү, ҙурайтыу; **укрупни́ть хозя́йства** хужалыҡтарҙы эреләтеү

**УКРУПНИ́ТЬСЯ** *сов.* эреләнеү, ҙурайыу

**УКРУПНЯ́ТЬ** *несов. см.* **укрупни́ть**

**УКРУПНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **укрупни́ться 2.** *страд. от* **укрупня́ть**

**УКРЫВА́ТЕЛЬ** *м* и **УКРЫВА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* йәшереүсе, йәшереп тотоусы

**УКРЫВА́ТЕЛЬСТВО** *с* йәшереү, йәшереп тотоу (һаҡлау); **обвиня́ть в укрыва́тельстве** йәшереп тотоуҙа ғәйепләү

**УКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **укры́ть**

**УКРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **укры́ться 2.** *страд. от* **укрыва́ть**

**УКРЫ́ТИЕ 1.** *см.* **укры́ть, укры́ться** 2; **2.** (*убежище*) ышыҡ урын (ер); нығытма; **подзе́мное укры́тие** ер аҫты нығытмаһы

**УКРЫ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*покрыть*) ябыу, ҡаплау, бөркәү, төрөү; **укры́ть одея́лом** юрған ябыу **2.** (*спрятать*) йәшереү, йәшереп тотоу (һаҡлау); **укры́ть посторо́ннего** сит кешене йәшереп тотоу

**УКРЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*покрыться*) ябыныу, ҡапланыу, бөркәнеү, төрөнөү; **укры́ться ша́лью** шәл ябыныу **2.** (*спрятаться*) йәшенеү, йәшеренеү, ышыҡланыу; **укры́ться от бура́на** бурандан ышыҡланыу

**У́КСУС** *м* һерҡә

**У́КСУСНЫЙ,** -ая, -ое һерҡә ...ы; **у́ксусный за́пах** һерҡә еҫе ♦ **у́ксусная кислота́** *хим.* һерҡә кислотаһы

**УКУ́ПОРИВАТЬ** *несов. см.* **уку́порить**

**УКУ́ПОРИТЬ** *сов. что* тығыу, тығып ҡуйыу, бөкөһөн (тығынын) тығып ҡуйыу; **уку́порить бо́чку** мискәнең бөкөһөн тығып ҡуйыу

**УКУ́ПОРКА** *ж* **1.** *см.* **уку́порить — уку́поривать 2.** (*пробка и т.п.*) тығын, бөкө

**УКУ́ПОРОЧНЫЙ,** -ая, -ое тығынлау ...ы, бөкөләү ...ы; **уку́порочная маши́на** тығынлау машинаһы

**УКУ́С** *м* **1.** *см.* **укуси́ть** 1; **2.** (*место укуса*) тешләнгән (сағылған) урын **3.** *разг.* төрттөрөү (семетеү) һүҙе

**УКУСИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** сағыу; (*о собаке и т.д.*) тешләү **2.** (*откусить*) тешләп алыу, умыра тешләү; **укуси́ть хлеб** икмәкте умыра тешләү **3.** *кого*; *разг.* (*подтрунить*) төрттөрөү, семетеү ♦ **(кака́я) му́ха укуси́ла** *см.* **му́ха**

**УКУ́ТАТЬ** *сов. кого-что* **1.** урау, төрөү, сырмау; **уку́тать ребёнка в одея́ло** баланы юрғанға төрөү **2.** *перен.* ҡаплау, ябыу, сорнау; **река́ уку́тана тума́ном** йылға томан менән ҡапланған

**УКУ́ТАТЬСЯ** *сов.* ураныу, төрөнөү, сырманыу; **уку́таться в шаль** шәлгә ураныу

**УКУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **уку́тать**

**УКУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уку́таться 2.** *страд. от* **уку́тывать**

**УЛА́ВЛИВАТЬ** *несов см.* **улови́ть**

**УЛА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **ула́вливать**

**УЛА́ДИТЬ** *сов. что* **1.** яйлау, яйға һалыу, көйләү, көйгә килтереү (һалыу); **ула́дить де́ло** эште яйлау; **ула́дить недоразуме́ние** аңлашылмаусанлыкты яйға һалыу **2.** (*наладить*) рәтләү, рәткә һалыу (килтереү); **ула́дить хозя́йство** хужалыкты рәткә килтереү

**УЛА́ДИТЬСЯ** *сов.* **1.** яйланыу, яйға һалыныу, көйләнеү, көйгә һалыныу; **де́ло ула́дилось** эш көйләнде; **отноше́ния ула́дились** мөнәсәбәттәр яйға һалынды **2.** рәтләнеү, рәткә һалыныу

**УЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **ула́дить**

**УЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ула́диться** **2.** *страд. от* **ула́живать**

**УЛА́МЫВАТЬ** *несов. см.* **улома́ть**

**УЛА́МЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **ула́мывать**

**УЛА́Н** *м* улан (*революцияға тиклем Рәсәй армияһында еңел кавалерия һалдаты йәки офицеры*)

**УЛА́НСКИЙ,** -ая, -ое улан(дар) ...ы; **ула́нский полк** уландар полкы

**УЛЕЖА́ТЬ** *сов.*; *разг.* (сыҙап) ята алыу; **улежа́ть до́лго** оҙаҡ ята алыу

**УЛЕЖА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** оҙаҡ ятыуҙан (баҫылыуҙан, ята-ята) йәпләнеү; **ли́стья пло́тно улежа́лись** япраҡтар ята-ята йәпләнгән **2.** ята-ята бешеү (етеү, өлгөрөү)

**УЛЁЖИВАТЬСЯ** *сов. см.* **улежа́ться**

**У́ЛЕЙ** *м* умарта; **коло́дочный у́лей** түмәр умарта; **ра́мочный у́лей** рамлы умарта

**УЛЕПЕТНУ́ТЬ** *сов.*; *прост.* тайыу, шылыу, һыҙыу, ҡасыу

**УЛЕПЁТЫВАТЬ** *несов. см.* **улепетну́ть**

**УЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **улете́ть**

**УЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** осоп китеү; **самолёт улете́л во́время** самолёт ваҡытында осоп китте **2.** *перен.* юҡҡа сығыу, юҡ булыу, елгә осоу; **мечты́ улете́ли** хыялдар юҡҡа сыҡты **3.** *перен.* үтеп китеү; **вре́мя улете́ло бы́стро** ваҡыт тиҙ үтеп китте

**УЛЕТУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов. см.* **улету́читься**

**УЛЕТУ́ЧИТЬСЯ** *сов.* **1.** *хим.*, *физ.* (*испариться*) осоп бөтөү, осоу; **эфи́р улету́чился** эфир осоп бөткән **2.** *перен.*, *разг.* юҡ булыу, һыҙыу, шылыу, тайыу

**УЛЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** ятыу; **уле́чься отдохну́ть** ял итеп алырға ятыу; **уле́чься на траве́** үләндә ятыу **2.** (*осесть*) баҫылыу, тымыу; **пыль на доро́ге улегла́сь** юлда туҙан баҫылды **3.** (*уместиться*) һыйыу, һыйып бөтөү **4.** *перен.* баҫылыу, тыныу; **волне́ние улегло́сь** тулҡынланыу баҫылды

**УЛИЗНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ҡасыу, тайыу, һыҙыу, шылыу; **улизну́ть с собра́ния** йыйылыштан ҡасыу

**УЛИ́КА** *ж* дәлил, енәйәт билгеһе (эҙе); **неопровержи́мые ули́ки** кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр

**УЛИ́ТКА** *ж* **1.** *зоол.* ҡусҡар **2.** *анат.* ҡусҡар (*эске ҡолаҡ*)

**У́ЛИЦА** *ж* **1.** урам; **городска́я у́лица** ҡала урамы; **перейти́ у́лицу** урам(ды) аша сығыу **2.** *разг.* (*внешняя среда*) тыш, урам; **на у́лице хо́лодно** тышта һыуыҡ **3.** *перен.* урам; **дурно́е влия́ние у́лицы** урамдың кире йоғонтоһо ♦ **вы́бросить (вы́кинуть, вы́швырнуть) на у́лицу** *кого кемде* урамға сығарып ташлау, урамға ҡыуып сығарыу; **на у́лице (оказа́ться, оста́ться)**: 1) өйһөҙ ҡалыу, йортһоҙ-ерһеҙ ҡалыу; 2) эшһеҙ ҡалыу; **с у́лицы** урамдан; **бу́дет и на на́шей (мое́й, твое́й) у́лице пра́здник** беҙҙең (минең, һинең) урамда ла байрам булыр әле (*алдағы еңеү, уңыш шатлығын белдерә*)

**УЛИЧА́ТЬ** *несов. см.* **уличи́ть**

**УЛИЧА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **улича́ть**

**УЛИЧИ́ТЬ** *сов. кого-что*, *в чём* фаш итеү, (ғәйебен) асып һалыу, (йөҙөн) асып биреү, тотоу; **уличи́ть в кра́же** урлашыуҙа фаш итеү; **уличи́ть в обма́не** алдашыуын асып һалыу

**У́ЛИЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** урам ...ы; **у́личные фонари́** урам фонарҙары; **у́личный бой** урам һуғышы **2.** урам яҡ, урам яҡ ...ы (*урам яҡҡа ҡараған*, *урамға сыға торған*); **у́личная дверь** урам яҡ ишек **3.** *разг.* ҡарауһыҙ, урам ...ы; **у́личные ребя́та** урам малайҙары

**УЛО́В** *м* табыш, тотолған (эләккән) балыҡ (йәнлек, ҡош-ҡорт); **бога́тый уло́в ры́бы** күп тотолған балыҡ

**УЛОВИ́МЫЙ,** -ая, -ое тоторлоҡ, һиҙелерлек, тойорлоҡ, ҡолаҡҡа сағылған; **едва́ улови́мый звук** ҡолаҡҡа саҡ ҡына сағылған тауыш

**УЛОВИ́ТЕЛЬ** *м*; *тех.* тотҡос, туплағыс; **улови́тель металли́ческой пы́ли** металл туҙанын тотҡос

**УЛОВИ́ТЬ** *сов. что* **1.** тотоп алыу, ишетеп (күреп, һиҙеп) алыу (ҡалыу); **улови́ть его́ взгляд** ҡарашын тотоп алыу; **улови́ть знако́мый моти́в** таныш көйҙө ишетеп алыу **2.** *перен.* (*понять что-л.*) аңлап алыу (ҡалыу), тотоп алыу; **улови́ть смысл его́ слов** һүҙҙәренең мәғәнәһен аңлап ҡалыу **3.** *разг.* эләктереү, эләктереп алыу (ҡалыу); **улови́ть моме́нт** уңай мәлде эләктереп алыу **4.** *спец.* айырыу, айырып сығарыу (алыу); **улови́ть побо́чные проду́кты** артыҡ продукттарҙы айырып сығарыу

**УЛО́ВКА** *ж* хәйлә, һылтау, әмәл; **пусти́ться на уло́вки** хәйлә табыу (эҙләү), хәйләләргә тырышыу

**УЛОЖЕ́НИЕ** *с*; *уст.* (*свод законов*) закондар йыйылмаһы

**УЛОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һалыу, ятҡырыу; **уложи́ть больно́го на крова́ть** ауырыуҙы караватҡа һалыу; **уложи́ть ребёнка спать** баланы йоҡларға ятҡырыу **2.** рәтләп (теҙеп, өйөп) һалыу (ҡуйыу); **уложи́ть дрова́ в поле́нницы** утынды эрҙәнәләргә өйөп һалыу; **уложи́ть во́лосы** сәсте рәтләп ҡуйыу **3.** *что* һалыу, үткәреү; **уложи́ть нефтепрово́д** нефть үткәргес һалыу; **уложи́ть ре́льсы** рельстар һалыу **4.** *во что*; *разг.* урынлаштырыу, һыйҙырыу, үтәү; **уложи́ть те́зисы в две страни́цы** тезистарҙы ике биткә һыйҙырыу;

**уложи́ть рабо́ту в срок** эште билдәләнгән ваҡытына үтәү **5.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* (*убить*) йығып (үлтереп) һалыу, йыға (үлтерә) һуғыу (атыу); **уложи́ть во́лка с пе́рвого вы́стрела** бүрене бер атыуҙан үлтереп һалыу **6.** тултырыу, һалыу, төйнәү; **уложи́ть ве́щи в чемода́н** әйберҙәрҙе сумаҙанға тултырыу

**УЛОЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* йыйыныу, төйнәнеү, йыйынып (төйнәнеп) тороу; **уложи́ться пе́ред отъе́здом** юлға сығыр алдынын йыйынып тороу **2.** һыйыу, һыйып бөтөү; **ве́щи уложи́лись в чемода́н** әйберҙәр сумаҙанға һыйып бөттө **3.** *перен.* һыйыу; **уложи́ться в сме́ту** сметаға һыйыу

**УЛОМА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* көскә күндереү, көскә ризалаштырыу (ризалығын алыу); **улома́ть дру́га** дуҫты көскә күндереү

**УЛУ́С** *м* улус (**1.** *Урта һәм Үҙәк Азияла, Себерҙә йәшәгән халыҡтарҙың ырыу-ҡәбилә берләшмәһе* **2.** *элекке Рәсәйҙә бурәт, ҡалмыҡ, якут халыҡтарында ерле-административ бүленеш* **3.** *тар. төрки-монгол халыҡтарының ауылдары һәм тороп киткән урындары*)

**УЛУ́СНЫЙ,** -ая, -ое улус ...ы; **улу́сный сход** улус йыйыны

**УЛУЧА́ТЬ** *несов. см.* **улучи́ть**

**УЛУЧИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* яйын табыу, тура килтереү; **улучи́ть моме́нт** ваҡытын тура килтереү

**УЛУЧША́ТЬ** *несов. см.* **улу́чшить**

**УЛУЧША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **улу́чшиться 2.** *страд. от* **улучша́ть**

**УЛУЧШЕ́НИЕ** *с см.* **улу́чшить — улучша́ть, улу́чшиться — улучша́ться**; **улучше́ние ка́чества проду́кции** продукцияның сифатын яҡшыртыу

**УЛУ́ЧШИТЬ** *сов. что* яҡшыртыу, һәйбәтләү, яҡшырта (һәйбәтләй) төшөү; **улу́чшить воспита́тельную рабо́ту** тәрбиәүи эште яҡтыртыу

**УЛУ́ЧШИТЬСЯ** *сов.* яҡшырыу, һәйбәтләнеү, яҡшыра (һәйбәтләнә) төшөү; **его́ здоро́вье улу́чшилось** уның һаулығы һәйбәтләнде

**УЛЫБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** йылмайыу, көләмһерәү, йылмайып (көләмһерәп) ҡарау; **приве́тливо улыба́ться** алсаҡ йылмайыу; **глаза́ его́ улыба́ются** уның күҙҙәре йылмая **2.** *кому*; *перен.* уңай килеп тороу, йылмайып ҡарау (ҡуйыу); **жизнь ему́ всегда́ улыба́лась** тормош уға һәр ваҡыт уңай килеп торҙо **3.** *кому* (*обычно с отрицанием* "*не*"); *перен.*, *разг.* оҡшау, күңелгә ятыу (ятмау); **тако́й поворо́т де́ла ему́ не улыба́лся** эштең бындай боролош алыуы уға оҡшамай ине

**УЛЫ́БКА** *ж* йылмайыу; **весёлая улы́бка** күңелле йылмайыу

**УЛЫБНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *см.* **улыба́ться 2.** *в 3 л.*; *перен.*, *разг.* (*не осуществиться, не достаться кому-л.*) теймәү, тәтемәү, эләкмәү, яҙмау; **путёвка улыбну́лась** путёвка эләкмәне; **споко́йная жизнь улыбну́лась** тыныс тормош яҙманы

**УЛЫ́БЧИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*весёлый*) асыҡ сырайлы, илгәҙәк, алсаҡ; **улы́бчивая де́вушка** алсаҡ ҡыҙ **2.** (*выражающий улыбку*) көләкәс, көләс, йылмайыусан; **улы́бчивые глаза́** көләс күҙҙәр

**УЛЬТИМАТИ́ВНО** *нареч.* ҡәтғи (киҫкен) рәүештә; **заяви́ть ультимати́вно** ҡәтғи рәүештә белдереү

**УЛЬТИМАТИ́ВНОСТЬ** *ж* ҡәтғилек, киҫкенлек; **ультимати́вность заявле́ния** белдереүҙең ҡәтғилеге

**УЛЬТИМА́ТУМ** *м* ультиматум, ҡәтғи (киҫкен) талап; **предъяви́ть ультима́тум** ультиматум ҡуйыу

**УЛЬТРА...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "артыҡ", "үтә", "бик", "сиктән тыш" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **ультракра́сный** үтә ҡыҙыл

**УЛЬТРАЗВУ́К** *м*; *физ.* ультразвук, ультратауыш (*үтә юғары йышлыҡтағы тирбәлеүҙән барлыҡҡа килгән, ҡолаҡҡа ишетелмәй торған тауыш*)

**УЛЬТРАЗВУКОВО́Й,** -ая, -ое *физ.* ультразвук ...ы, ультратауыш ...ы; **ультразвуковы́е во́лны** ультратауыш тулҡындары

**УЛЬТРАКОРО́ТКИЙ,** -ая, -ое *физ.* ультраҡыҫҡа, үтә ҡыҫҡа; **ультракоро́ткие во́лны** ультраҡыҫҡа тулҡындар

**УЛЬТРАКОРОТКОВО́ЛНОВЫЙ** и **УЛЬТРАКОРОТКОВОЛНО́ВЫЙ,** -ая, -ое *физ.* ультраҡыҫҡа (үтә ҡыҫҡа) тулҡынлы (*үтә ҡыҫҡа тулҡында эшләй торған*); **ультракоротково́лновая ста́нция** үтә ҡыҫҡа тулҡынлы станция

**УЛЬТРАМАРИ́Н** *м* ультрамарин (*асыҡ зәңгәр төҫтәге буяу*)

**УЛЬТРАФИОЛЕ́ТОВЫЙ: ультрафиоле́товые лучи́** *физ.* ультрафиолет нурҙар

**УЛЮЛЮ́КАНЬЕ** *с см.* **улюлю́кать**

**УЛЮЛЮ́КАТЬ** *несов.* **1.** һайтылдау, (этте) һөсләтеү **2.** *перен.*, *разг.* (*публично травить кого-л.*) һөсләтеү, ҡаршы ҡотортоу, мыҫҡыллап ҡысҡырыу, ҡысҡырып ыҙалатыу

**УМ** *м* **1.** аҡыл; **здра́вый ум** сәләмәт аҡыл; **приро́дный ум** тәбиғи аҡыл **2.** *перен.* аҡыл эйәһе, фекер эйәһе; **челове́к большо́го ума́** ҙур аҡыл эйәһе ♦ **без ума́ (быть)**: 1) *от кого-чего* иҫ-аҡыл китеү, аҡылды юйып, юғалтып; 2) аҡылдан шашып, сиктән тыш, бик ныҡ; **быть не в своём уме́** аҡылды (башты) юғалтыу; **в уме́** күңелдән, яттан (иҫәпләү); **(и) в уме́ нет (не́ было)** башта ла (иҫтә лә) юҡ (ине); **из ума́ вон** иҫтән (хәтерҙән) сыҡҡан; **на уме́ (быть)** уйҙа, башта; **ума́ не приложу́** аҡыл (баш, зиһен) етмәй, башҡа килтерә алмау; **уму́ непостижи́мо** *см.* **непостижи́мый**; **уму́-ра́зуму учи́ть** аҡыл өйрәтеү; **ум за ра́зум захо́дит** баш бутала, башы эшләмәү, зиһене таралыу; **раски́нуть умо́м** башты эшләтеү, аҡылды эшкә ҡушыу; **лиши́ться ума́** аҡылдан яҙыу; **навести́ (наста́вить) на ум** *см.* **навести́**; **помеша́ться в уме́** яңылыша башлау; **прийти́ на ум** башҡа килеү, иҫкә төшөү; **свести́ с ума́** *кого*: 1) аҡылдан яҙҙырыу; 2) башын әйләндереү, ма-

уыктырыу; **не моего́ (твоего́, на́шего, ва́шего) ума́ де́ло** минең (һинең, беҙҙең, һеҙҙең) эш түгел, миңә (һиңә, беҙгә, һеҙгә) ҡағылмай; **от большо́го (с большо́го) ума́ (сде́лать)** *что*; *ирон.* (үҙеңде) үтә аҡыллы тип һанауҙан, ахмаҡлыҡтан (эшләү); **с ума́ сойти́!** иҫең китер!, иҫ китерлек!; **себе́ на уме́** *кто* хәйләкәр, башы йомро

**УМАЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *уст. см.* **уме́ньшить 2.** (*преуменьшить значение*) кәметеү, төшөрөү, кәметеп күрһәтеү; **умали́ть значе́ние** әһәмиәтен кәметеп күрһәтеү **3.** (*принизить*) төшөрөү; **умали́ть авторите́т** абруйын төшөрөү

**УМАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *уст.* **уме́ньшиться 2.** кәмеү, төшөү, түбәнәйеү; **его́ досто́инство не умали́лось** уның абруйы төшмәне

**УМАЛИШЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҡылдан яҙған, аҡылдан шашҡан **2.** *в знач. сущ.* **умалишённый** *м* и **умалишённая** *ж* аҡылдан яҙған кеше, диуана

**УМА́ЛЧИВАТЬ** *несов. см.* **умолча́ть**

**УМА́ЛЧИВАТЬСЯ** *несов. о ком-чём безл.* әйтелмәү, һөйләнмәү, һүҙ сығармау, баҫырыу, иҫкә (телгә) алынмау

**УМАЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **умали́ть**

**УМАЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **умали́ться 2.** *страд. от* **умаля́ть**

**УМА́СЛИВАТЬ** *несов. см.* **ума́слить**

**УМА́СЛИТЬ** *сов. кого-что*; *перен.*, *разг.* (*задобрить*) майлау, йыумалау, ыңғайына һыйпау

**УМА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **умота́ть**

**УМА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **умота́ться 2.** *страд. от* **ума́тывать** 1

**УМА́ЯТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* (*утомить*) йонсотоу, әлһерәтеү; **ума́ять ребёнка** баланы йонсотоу

**УМА́ЯТЬСЯ** *сов.*; *прост.* йонсоу, әлһерәү, хәлдән тайыу

**У́МБРА** *ж* умбра (*көрән төҫтәге минераль буяу*)

**УМЕ́ЛЕЦ** *м* оҫта, оҫта ҡул, ҡулы оҫта кеше

**УМЕ́ЛОСТЬ** *с* оҫталыҡ, маһирлыҡ; **уме́лость води́теля** машина йөрөтөүсенең оҫталығы

**УМЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое оҫта, оҫта ҡуллы, маһир; **уме́лый адвока́т** оҫта адвокат; **уме́лый руководи́тель** маһир етәксе

**УМЕЛЬЧА́ТЬ** *несов. см.* **умельчи́ть**

**УМЕЛЬЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **умельчи́ться 2.** *страд. от* **умельча́ть**

**УМЕЛЬЧИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ваҡлау, ваҡландырыу

**УМЕЛЬЧИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ваҡланыу, вағайыу

**УМЕ́НИЕ** *с* оҫталыҡ, белеү; (*сноровка*) оҫол, таҫыл; **уме́ние заводи́ть бесе́ду** әңгәмәне ҡороп ебәреү оҫталығы

**УМЕНЬША́ЕМЫЙ,** ая, -ое **1.** *прич. от* **уменьша́ть 2.** *в знач. сущ.* **уменьша́емое** *с*; *мат.* кәмеүсе һан, кәметелеүсе

**УМЕНЬША́ТЬ** *несов. см.* **уме́ньшить**

**УМЕНЬША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уме́ньшиться 2.** *страд. от* **уменьша́ть**

**УМЕНЬШЕ́НИЕ** *с см.* **уме́ньшить — уменьша́ть**, **уме́ньшиться — уменьша́ться**

**УМЕНЬШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кесерәйткес, кесерәйтә торған, кесерәйтеп күрһәтә торған; **уменьши́тельное стекло́** кесерәйтеп күрһәтә торған быяла **2.** *лингв.* кесерәйтеүле, кесерәйтеү ...ы; **уменьши́тельный су́ффикс** кесерәйтеү суффиксы **3.** (*об имени собственном*) кесерәйтелгән, ҡыҫҡартылған (*мәҫ.*, *Лотфулла—Лотфой*, *Миңлеямал—Ямал*)

**УМЕ́НЬШИТЬ** и *уст.* **УМЕНЬШИ́ТЬ** *сов. что* (*по количеству*, *величине*, *объёму*) аҙайтыу, кәметеү, бәләкәйләтеү, бәләкәсәйтеү, кесерәйтеү; (*по степени*, *силе*, *интенсивности*) кәметеү, аҙайтыу; **уме́ньшить пото́к воды́** һыу ағымын аҙайтыу; **уме́ньшить объём рабо́ты** эш күләмен кәметеү

**УМЕ́НЬШИТЬСЯ** и *уст.* **УМЕНЬШИ́ТЬСЯ** *сов.* аҙайыу, кәмеү, бәләкәйләнеү, бәләкәсәйеү, кесерәйеү; **дохо́д уме́ньшился наполови́ну** килем яртылайға аҙайҙы; **зной уме́ньшился** эҫелек кәмене

**УМЕ́РЕННОСТЬ** *ж* уртасалыҡ, уртаса булыу, артыҡ булмау; **уме́ренность взгля́дов** ҡараштарҙың уртасалығы; **уме́ренность расхо́дов** сығымдарҙың артыҡ булмауы

**УМЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уме́рить 2.** *прил.* (*не выше среднего уровня*) уртаса, урта кимәлдәге; **уме́ренный хо́лод** уртаса һыуыҡ; **уме́ренная цена́** уртаса хаҡ **3.** *прил.*; *геогр.* уртаса; **уме́ренный кли́мат** уртаса климат **4.** *прил.* уртасыл (ҡарашлы), урталыҡты тотоусы; **уме́ренная поли́тика** уртасыл сәйәсәт

**УМЕРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** үлеү, вафат булыу, донъя ҡуйыу, йән биреү; **умере́ть свое́й сме́ртью** үҙ үлеме менән үлеү **2.** *за кого-что* и *без доп.* һәләк булыу, (йәнде) фиҙа ҡылыу; **умере́ть за пра́вое де́ло** изге эш өсөн йәнде фиҙа ҡылыу **3.** *перен.* үлеү, юғалыу, юҡ булыу, юҡҡа сығыу; **на́ше де́ло не умрёт** беҙҙең эш юҡҡа сыҡмаҫ ♦ **хоть умри́** мотлаҡ, нисек итеп булһа ла (*ғүәц*, *башҡарыу*)

**УМЕ́РИТЬ** *сов. что* баҫыу, кәметеү, сикләү; **уме́рить шаг** аҙымды кәметеү; **уме́рить шум** шаушыуҙы баҫыу; **уме́рить пыл** дәртте кәметеү

**УМЕ́РИТЬСЯ** *сов.* баҫылыу, кәмеү, сикләнеү; **тре́бования уме́рились** талаптар сикләнде

**УМЕРТВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* үлтереү, ғүмерен киҫеү, йәнен алыу **2.** *перен.* йәнһеҙләндереү, үлтереү; **умертви́ть дух** рухты йәнһеҙләндереү

**УМЕРЩВЛЕ́НИЕ** *с см.* **умертви́ть — умерщвля́ть**

**УМЕРЩВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **умертви́ть**

**УМЕРЩВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **умерщвля́ть**

**УМЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **уме́рить**

**УМЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уме́риться 2.** *страд. от* **умеря́ть**

**УМЕСТИ́ТЬ** *сов. кого-что* урынлаштырыу, һыйҙырыу, урынлаштырып (һыйҙырып) бөтө-

рөү; **умести́ть кни́ги в шкафу́** китаптарҙы шкафҡа һыйҙырыу

**УМЕСТИ́ТЬСЯ** *сов.* урынлашыу, һыйыу, урынлашып (һыйып) бөтөү; **все умести́лись за столо́м** бөтәһе лә өҫтәл артына һыйҙы

**УМЕ́СТНОСТЬ** *ж* урынлылыҡ, урынлы булыу; **уме́стность вопро́са** һорауҙың урынлы булыуы

**УМЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое урынлы, ваҡытлы; **уме́стные замеча́ния** урынлы иҫкәрмәләр

**УМЕ́ТЬ** *несов. с неопр.* белеү, булдыра алыу, ҡулдан килеү; **уме́ть завести́ бесе́ду** әңгәмә ҡора белеү; **я э́того не уме́ю** мин быны булдыра алмайым

**УМЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **умести́ть**

**УМЕЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **умести́ться** **2.** *страд. от* **умеща́ть**

**УМЕ́ЮЧИ** *нареч.*; *разг.* белеп, рәтен белеп, оҫталыҡ менән; **де́лать уме́ючи** рәтен белеп эшләү

**УМИЛЕ́НИЕ** *с* күңел йомшарыу (нескәреү, тулыу), тәьҫирләнеү; **прийти́ в умиле́ние** күңел йомшарып китеү

**УМИЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **умили́ть** **2.** *прил.* күңеле йомшарған (нескәргән, тулған), әҫәрләнгән; **умилённый взгляд** әҫәрләнгән ҡараш

**УМИЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күңелде йомшарта (нескәртә, иретә) торған, һөйкөмлө; **умили́тельное зре́лище** күңелде нескәртә торған тамаша; **умили́тельный ребёнок** һөйкөмлө бала

**УМИЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* күңелде йомшартыу (нескәртеү, иретеү), әҫәрләндереү

**УМИЛИ́ТЬСЯ** *сов.* күңел йомшарыу (нескәреү, иреү), әҫәрләнеү; **умили́ться бескоры́стию** эскерһеҙлеккә күңел иреү

**УМИ́ЛОСТИВИТЬ** *сов. кого-что* шәфҡәт (мәрхәмәт) уятыу, шәфҡәтлеләндереү, мәрхәмәтлеләндереү

**УМИ́ЛОСТИВИТЬСЯ** *сов.* шәфҡәт (мәрхәмәт) уяныу, шәфҡәтлеләнеү, мәрхәмәтлеләнеү

**УМИЛОСТИВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **уми́лостивить**

**УМИЛОСТИВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уми́лостивиться** **2.** *страд. от* **умилостивля́ть**

**УМИЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **умили́ть**

**УМИЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **умили́ться**

**УМИНА́ТЬ** *несов. см.* **умя́ть**

**УМИНА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **умя́ться** **2.** *страд. от* **умина́ть**

**УМИРА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **умере́ть** **2.** (*испытывать в сильной степени*) үлеп барыу; **умира́ть с го́лоду** асығып үлеп барыу; **умира́ть со ску́ки** эс бошоп үлеп барыу; **умира́ть со́ смеху** көлөп үлеп барыу

**УМИРА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **умира́ть** **2.** *в знач. сущ.* **умира́ющий** *м* и **умира́ющая** *ж* үлеп барыусы, үлем хәлендә ятыусы **3.** *прил.*; *перен.* (*слабый, безжизненный*) хәлһеҙ, көсһөҙ, зәғиф; **говори́ть умира́ющим го́лосом** хәлһеҙ тауыш менән һөйләү

**УМИРОТВОРЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **умиротвори́ть** **2.** *прил.* тыныс, ҡәнәғәт; **умиротворённое выраже́ние** тыныс ҡиәфәт

**УМИРОТВОРИ́ТЬ** *сов. кого-что* тынысландырыу, ҡәнәғәтләндереү, ризалаштырыу; **умиротвори́ть наро́д** халыҡты тынысландырыу

**УМИРОТВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* тынысланыу, тынығыу, ҡәнәғәтләнеү; **се́рдце умиротвори́лось** йөрәк тынысланды

**УМИРОТВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **умиротвори́ть**

**УМИРОТВОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **умиротвори́ться** **2.** *страд. от* **умиротворя́ть**

**УМНЕ́ТЬ** *несов.* аҡылланыу, аҡыллана барыу (төшөү), аҡылға ултырыу; **ребёнок умне́ет** бала аҡыллана

**У́МНИК** *м*; *разг.* **1.** (*умный человек*) аҡыллы кеше, аҡыл эйәһе **2.** (*рассудительный мальчик*) аҡыллы малай, башлы малай **3.** *ирон.* аҡыллы баш, аҡыл һатыусы

**У́МНИЦА** *м* и *ж*; *разг.* **1.** (*умный человек*) аҡыллы кеше, аҡыл эйәһе **2.** (*рассудительный ребёнок*) аҡыллы (башлы) бала

**У́МНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *неодобр.* аҡыл һатыу, аҡыл өйрәтеү **2.** (үҙенсә) ҡыланыу, хикмәтләнеү; **у́мничает как хо́чет** үҙе теләгенсә ҡылана

**УМНОЖА́ТЬ** *несов. см.* **умно́жить**

**УМНОЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **умно́житься** **2.** *страд. от* **умножа́ть**

**УМНОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **умно́жить** — **умножа́ть** 2, **умно́житься** — **умножа́ться** **2.** *мат.* ҡабатлау, ҡабатлау ғәмәле; **табли́ца умноже́ния** ҡабатлау таблицаһы

**УМНО́ЖИТЬ** *сов. что* **1.** *мат.* ҡабатлау **2.** (*увеличить в числе*) арттырыу, үҫтереү, күбәйтеү, ишәйтеү; **умно́жить бога́тство** байлыҡты арттырыу; **умно́жить скот** малды ишәйтеү

**УМНО́ЖИТЬСЯ** *сов.* артыу, күбәйеү, ишәйеү, үҫеү

**У́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҡыллы, башлы, зирәк, зиһенле; **у́мный челове́к** аҡыллы кеше; **у́мный учени́к** башлы уҡыусы; **у́мное лицо́** аҡыллы йөҙ **2.** аҡыллы, төплө; **у́мный сове́т** төплө кәңәш ♦ **у́мная голова́** башлы кеше

**УМОЗАКЛЮЧА́ТЬ** *несов. см.* **умозаключи́ть**

**УМОЗАКЛЮЧА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **умозаключа́ть**

**УМОЗАКЛЮЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *лог.* хөкөм сығарыу, һығымта; **дедукти́вное умозаключе́ние** дедуктив һығымта **2.** *книжн.* йомғаҡ, һөҙөмтә, нәтижә; **сде́лать умозаключе́ние** һөҙөмтә яһау

**УМОЗАКЛЮЧИ́ТЬ** *сов. что*; *лог.*, *книжн.* һөҙөмтә сығарыу, йомғаҡ яһау, хөкөм йөрөтөү

**УМОЗРЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* ҡоро фекер

**УМОЗРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡоро фекерләүгә ҡоролған

**УМОИССТУПЛЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* аҡылдан шашыу, аҡылды юғалтып ярһыу

**УМОЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* (аҙарынып) үтенеү, инәлеп күндереү, инәлеү, ялыныу, ялбарыу; **умоли́ть бра́та прие́хать** ағайҙың килеүен аҙарынып үтенеү

**У́МОЛК: без у́молку** бер туктауһыҙ, өҙләкһеҙ

**УМОЛКА́ТЬ** *несов. см.* **умо́лкнуть**

**УМО́ЛКНУТЬ** *сов.* **1.** шымыу, шымып ҡалыу, тымыу, тымып ҡалыу, тыныу, баҫылыу; **ребёнок умо́лк** бала шымды; **голоса́ умо́лкли** тауыштар тынды; **ору́дия умо́лкли** туптар тынды **2.** *перен.* һүнеү; **сла́ва о наро́дных геро́ях не умо́лкнет никогда́** халыҡ ҡаһармандарының даны бер ваҡытта ла һүнмәҫ

**УМОЛО́Т** *м*; *с.-х.* төшөм, сығым, һуғылған ашлыҡ; **умоло́т ржи** арыш төшөмө

**УМОЛОТИ́ТЬ** *сов. что*; *с.-х.* һуғыу, һуғып алыу (бөтөрөү); **умолоти́ть пшени́цу** бойҙайҙы һуғып алыу

**УМОЛЧА́НИЕ** *с см.* **умолча́ть ♦ фигу́ра умолча́ния**: 1) *лит.* кинәйәле стилистик алым; 2) *ирон.* ситләтеп әйтеү

**УМОЛЧА́ТЬ** *сов. о ком-чём* әйтмәү, өндәшмәү, әйтмәй (өндәшмәй) ҡалдырыу, юрый әйтмәү; **умолча́ть об упуще́ниях** етешһеҙлектәр тураһында әйтмәй ҡалдырыу

**УМОЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **умоли́ть**

**УМОЛЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **умоля́ть** **2.** *прил.* инәлеүле, ялбарыулы, ялыныслы, үтенесле; **умоля́ющий взгляд** инәлеүле ҡараш; **с умоля́ющим ви́дом** ялбарыулы ҡиәфәт менән

**УМОНАСТРОЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* фекер йүнәлеше, иҫ-аҡыл көйләнгәнлеге; **умонастрое́ние молодёжи** йәштәрҙең фекер йүнәлеше

**УМОПОМЕША́ТЕЛЬСТВО** *с* аҡыл алмашыныу, аҡыл юйылыу, аҡылға еңеләйеү

**УМОПОМРАЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *уст. см.* **умопомеша́тельство** **2.** *в знач. сказ.*; *разг.* ғәжәп, хәтәр, иҫ китерлек (*хәл, нәмә һ.б.*); **у подру́ги шля́пка — умопомраче́ние** әхирәттең ҡалпағы иҫ китерлек **♦ до умопомраче́ния** иҫ киткес, ғәжәйеп, сиктән тыш

**УМОПОМРАЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* иҫ китерлек, ғәжәп, хәтәр, аҡылға һыймаҫлыҡ; **умопомрачи́тельный успе́х** иҫ китерлек уңыш

**УМО́РА** *ж в знач. сказ.*; *прост.* (үтә) көлкө, мәҙәк, кәмит; **слу́шать его́ — одна́ умо́ра** уны тыңлау — үҙе көлкө

**УМОРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* көлкөлө, һын ҡатырғыс, һын ҡатып көлөрлөк; **умори́тельный вид** һын ҡатырғыс ҡиәфәт

**УМОРИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** (*погубить*) ҡырыу, һәләк итеү **2.** (*утомить*) йонсотоу, хәлдән тайҙырыу, әлһерәтеү, ныҡ арытыу; **путеше́ствие умори́ло** сәйәхәт хәлдән тайҙырҙы **3.** (*сильно насмешить*) көлдөрөп арытыу, көлдөрөп хәлдән тайҙырыу; **умори́ть расска́зом** көлкө һөйләп хәлдән тайҙырыу

**УМОРИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* хәлдән тайыу, әлһерәү, нык арыу, йонсоу; **умори́ться от да́льней доро́ги** алыҫ юлдан йонсоу

**УМОСТИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** түшәү, түшәп сығыу; **умости́ть доро́гу булы́жником** урамға суйырташ түшәү **2.** (*уместить где-л., куда-л.*) һыйҙырыу, урынлаштырыу; **умости́ть ве́щи в рюкза́к** кәрәк-яраҡты биштәргә һыйҙырыу

**УМОСТИ́ТЬСЯ** *сов.* урынлашыу, һыйыу; **умости́ться на у́зкой крова́ти** тар ғына карауатҡа урынлашыу

**УМОТА́ТЬ** *сов.* **1.** (*обмотать*) урау, сырмау, сорнау **2.** *что* (*намотать*) төрөү, урау, урап ҡуйыу, сырмау; **умота́ть нить в клубо́к** епте йомғаҡҡа урап ҡуйыу **3.** *кого*; *прост.* (*сильно утомить*) арытыу, хәлдән тайҙырыу **4.** *без доп.*; *прост.* (*уйти откуда-л.*) тайыу, шылыу, һыҙыу, ҡасыу

**УМОТА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* ураныу, сорналыу; **умота́ться ша́рфом** шарфҡа ураныу **2.** *прост.* ныҡ арыу, хәлдән тайыу

**У́МСТВЕННОСТЬ** *ж*; *прост.* **1.** (*умственная деятельность*) аҡыллылыҡ, аҡыллы булыу **2.** (*разумное основание, смысл*) мәғәнәлелек, мәғәнәле булыу **3.** (*образованность, сообразительность*) аҡыллылыҡ, зирәклек

**У́МСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*интеллектуальный*) аҡыл ...ы; **у́мственный труд** аҡыл хеҙмәте; **у́мственные спосо́бности** аҡыл һәләте **2.** *прост.* (*умный, толковый*) аҡыллы

**У́МСТВОВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **у́мствовать** **2.** *разг.*, *ирон.* (*отвлечённое размышление*) аҡыл һатыу

**У́МСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** *уст.* уйлау, фекер йөрөтөү **2.** *разг.*, *ирон.* аҡыл йөрөтөү, аҡыл һатыу, фәлсәфә һатыу

**УМУДРЁННОСТЬ** *ж* аҡыллылыҡ, тәжрибәлелек, күпте күргәнлек

**УМУДРЁННЫЙ,** -ая, -ое аҡыл йыйған, тәжрибәле, күпте күргән

**УМУДРИ́ТЬ** *сов. кого-что* аҡылландырыу, аҡыл ултыртыу

**УМУДРИ́ТЬСЯ** *сов. с неопр.*; *разг.* **1.** аҡылланыу, аҡыл ултыртыу **2.** аҡыл (баш) етеү, яйын (әмәлен) табыу; **умудри́ться сохрани́ть де́ньги** аҡсаны һаҡларға баш етеү

**УМУДРЯ́ТЬ** *несов. см.* **умудри́ть**

**УМУДРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **умудри́ться** **2.** *страд. от* **умудря́ть**

**УМЧА́ТЬ** *сов. кого-что* елдереп (осороп, саптырып) алып китеү; **умча́ть госте́й из дере́вни** ҡунаҡтарҙы ауылдан саптырып алып китеү

**УМЧА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** елеп (сабып) китеп барыу, сабып сығып китеү, елдереп (саптырып) сығып китеү; **вса́дники умча́лись** һыбайлылар сабып сығып киттеләр **2.** *перен.* (*о времени*) үтеү, тиҙ үтеп китеү, бик тиҙ уҙыу; **ю́ность умча́лась** йәшлек тиҙ үтте

**УМЫВА́ЛЬНИК** *м* йыуынғыс, ҡулйыуғыс

**УМЫВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йыуыныу ...ы; **умыва́льные принадле́жности** йыуыныу кәрәк-яраҡтары **2.** *в знач. сущ.* **умыва́льная** *ж* йыуыныу бүлмәһе

**УМЫВА́ЛЬНЯ** *ж*; *разг. см.* **умыва́льный** 2

**УМЫВА́ТЬ** *несов. см.* **умы́ть**

**УМЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **умы́ться 2.** *страд. от* **умыва́ть**

**УМЫКА́НИЕ** *с* ҡыҙ урлау

**УМЫКА́ТЬ** *несов. см.* **умыкну́ть**

**УМЫКНУ́ТЬ** *сов. кого* ҡыҙ урлау

**У́МЫСЕЛ** *м* аҫтыртын уй (ҡылыҡ), яуыз (уҫал) ниәт, насар уй; **без вся́кого у́мысла** һис бер насар уйһыҙ; **сде́лать с у́мыслом** аҫтыртын ҡылыҡ ҡылыу

**УМЫ́СЛИТЬ** *сов.*; *уст.* уйлап ҡылыу

**УМЫ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** йыуыу, йыуындырыу; **умы́ть лицо́** битте йыуыу; **умы́ть ребёнка** баланы йыуындырыу **2.** *перен.* йыуыу; **дождь умы́л у́лицу** ямғыр урамды йыуҙы ♦ **умы́ть ру́ки** яуаплылыҡтан ҡасыу, ситкә китеү, үҙеңдән яуаплылыҡты төшөрөү

**УМЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йыуыныу, йыуынып алыу **2.** *перен.* сыланыу, йыуылыу; **трава́ умы́лась росо́й** үлән ысыҡҡа йыуылды

**УМЫ́ШЛЕННОСТЬ** *ж* уйлап (аңлы рәүештә, яуыз ниәт менән) эшләнеү (ҡылыныу); **умы́шленность де́йствий** эштең аңлы рәүештә ҡылыныуы

**УМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **умы́слить 2.** *прил.* уйлап, аңлы рәүештә, яуыз ниәт менән; **умы́шленное уби́йство** аңлы рәүештә үлтереү; **умы́шленное искаже́ние те́кста** тексты аңлы рәүештә боҙоу

**УМЫШЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **умы́слить**

**УМЫШЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **умышля́ть**

**УМЯ́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* (*сделать мягким*) иҙеү, баҫыу, иҙеп (баҫып) үҙләндереү (йомшартыу), иҙеп (баҫып) еткереү; **умя́ть гли́ну** балсыҡты баҫып еткереү **2.** *разг.* (*уплотнить*) баҫыу, тапау; **умя́ть снег** ҡарҙы тапау; **умя́ть се́но** бесәнде баҫып тапау **3.** *прост.* (*быстро и много съесть*) һоғаланып ашау, йыпырыу; **умя́ть таре́лку су́па** бер тәрилкә ашты йыпырыу

**УМЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*стать мягким*) иҙелеү, баҫылыу, йомшарыу, иҙелеп (баҫылып) етеү, үҙләнеү; **гли́на умя́лась** балсыҡ иҙелеп етте **2.** (*стать плотным*) баҫылыу, тапалыу; **снег умя́лся** ҡар тапалды

**УНАВО́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **унаво́зить**

**УНАВО́ЖИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **унаво́живать**

**УНАВО́ЗИТЬ** *сов. что* тиреҫләү, тиреҫ индереү, тиреҫ менән ашлау; **унаво́зить по́чву** тупраҡты тиреҫләү

**УНАСЛЕ́ДОВАТЬ** *сов. см.* **насле́довать** 1

**УНЕСТИ́** *сов. кого-что* **1.** (*взять с собой*) алып китеү; **унести́ кни́ги** китаптарҙы алып китеү **2.** *разг.* (*украсть*) урлап (һорамай) алып китеү **3.** (*переместить, увлечь*) алып китеү, ағыҙып (осороп) алып китеү; **ло́дку унесло́ ве́тром** *безл.* кәмәне ел алып киткән **4.** *перен.* (*отнять, лишить чего-л.*) алыу, алып китеү, йотоу; **война́ унесла́ мно́го жи́зней** һуғыш бик күп ғүмерҙәрҙе алып китте ♦ **е́ле (едва́) но́ги унести́** көс-хәлгә ҡасып ҡотолоу; **унести́ (с собо́й) в моги́лу** *что* үҙең менән ҡәбергә алып китеү (*серен әйтмәй үлеп китеү*)

**УНЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** (*быстро перемещаясь, удалиться*) сабып (саптырып) сығып китеү, йүгереп китеп барыу; (*о тучах, дыме и т.п.*) ағылыу; **ту́чи унесли́сь на се́вер** болоттар төньяҡҡа ҡарай ағылды **2.** *перен.* үтеү, үтеп китеү, уҙыу; **унесли́сь го́ды мо́лодости** йәшлек йылдары үтеп китте

**УНИВЕРМА́Г** *м* (*универсальный магазин*) универмаг

**УНИВЕРСА́Л** *м* универсал (*үҙ һөнәре буйынса күп яҡлы белгес*); **констру́ктор-универса́л** универсал конструктор

**УНИВЕРСАЛИ́ЗМ** *м* универсализм (*белемдең төрлө тармаҡтарын белеү, һәр яҡлап белемле булыу*)

**УНИВЕРСА́ЛЬНОСТЬ** *ж* универсаллек (*күп яҡлылыҡ*)

**УНИВЕРСА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое универсаль; **универса́льный хиру́рг** универсаль хирург; **универса́льная маши́на** универсаль машина; **универса́льный стано́к** универсаль станок

**УНИВЕРСА́М** *м* универсам (*үҙеңде үҙең хеҙмәтләндерә торған аҙыҡ-түлек магазины*)

**УНИВЕРСИА́ДА** *ж* универсиада (*студенттарҙың донъя спорт ярыштары*)

**УНИВЕРСИТЕ́Т** *м* университет; **поступи́ть в университе́т** университетҡа уҡырға инеү

**УНИВЕРСИТЕ́ТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** университет ...ы, университетлы; **университе́тский уста́в** университет уставы **2.** университетта бергә уҡыған; **университе́тский това́рищ** университетта бергә уҡыған иптәш

**УНИЖА́ТЬ** *несов. см.* **уни́зить**

**УНИЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уни́зиться 2.** *страд. от* **унижа́ть**

**УНИЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **уни́зить** — **унижа́ть, уни́зиться** — **унижа́ться 2.** (*то, что оскорбляет*) мәсхәрә, хурлыҡ, кәмһетеү, түбәнһетеү; **терпе́ть униже́ния** кәмһетеүҙәргә түҙеү

**УНИ́ЖЕННОСТЬ** *ж* мәсхәрәлек, хурлыҡ, кәмһетелгәнлек, түбәнһетелгәнлек

**УНИ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уни́зить 2.** *прил.* (*подвергнутый унижению*) кәмһетелгән, түбәнһетелгән, хурланған, мәсхәрә ителгән; **чу́вствовать себя́ уни́женным** үҙеңде кәмһетелгән итеп тойоу **3.** *прил.* (*раболепно смиренный*) кәмһенә (түбәнһенә) торған, кәмһенеүле; **уни́женная про́сьба** кәмһенеүле үтенес

**УНИЖЁННЫЙ,** -ая, -ое *уст.* (*терпящий унижения, обиды*) иҙелгән, рәнйетелгән, ҡыйырһытылған, йәберләнгән; **униженный невзгóдами жи́зни** тормош михнәттәренән иҙелгән

**УНИЗА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*нанизать*) теҙеү, теҙеп сығыу, теҙеп ҡуйыу **2.** баҫыу, баҫып сығыу; **униза́ть пóяс серéбряными монéтами** билбауға көмөш тәңкәләр баҫып сығыу

**УНИЗИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* кәмһетелгәнлек, түбәнһетелгәнлек, кәмһетә (түбәнһетә) торған булыу

**УНИЗИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кәмһетә (түбәнһетә) торған, кәмһетеүле, хурлыҡлы; **чу́вствовать себя́ в унизи́тельном положéнии** үҙеңде кәмһетеүле хәлдә тойоу

**УНИ́ЗИТЬ** *сов. кого-что* кәмһетеү, түбәнһетеү, намыҫына тейеү, дәрәжәһен төшөрөү; **не позвóлить уни́зить себя́** үҙеңде кәмһетеүгә юл ҡуймау

**УНИ́ЗИТЬСЯ** *сов.* түбәнһенеү, кәмһенеү, үҙен кәмһетеү

**УНИ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **униза́ть**

**УНИ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **уни́зывать**

**УНИКА́ЛЬНОСТЬ** *ж* уникаллек

**УНИКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое уникаль; **уника́льное произведéние** уникаль әҫәр

**У́НИКУМ** *м* уникум (*һирәк осрай торған берҙән-бер әйбер*)

**УНИМА́ТЬ** *несов. см.* **уня́ть**

**УНИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уня́ться 2.** *страд. от* **унима́ть**

**УНИСО́Н** *м*; *муз.* унисон (*бер нисә тауыштың йәки төрлө октаваларҙағы оҡшаш тауыштарҙың төрлө бейеклектә аһәңдәш яңғырашы*) ♦ **в унисо́н**: 1) бер тауыштан, аһәңле; 2) *перен.* берҙәм рәүештә, килешеп

**УНИТА́З** *м* унитаз

**УНИТА́РНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* унитар, берләштерелгән; **унита́рная респу́блика** унитар республика

**УНИФИКА́ЦИЯ** *ж* унификациялау, унификациялаштырыу, унификация яһау; **унифика́ция орфогра́фии** орфографияны унификациялау

**УНИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* унификациялау, унификациялаштырыу, унификация яһау; **унифици́ровать пра́вила правописа́ния** дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен унификациялау

**УНИФИЦИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* унификацияланыу, унификациялашыу **2.** *несов. страд. от* **унифици́ровать**

**УНИФО́РМА** *ж* униформа (**1.** *форма кейеме* **2.** *собир.*; *цирк. цирк аренаһында төрлө ярҙамсы эштәрҙе үтәп йөрөүсе форма кейемендәге хеҙмәтселәр*)

**УНИЧИЖИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст. см.* **унизи́тельный 2.** *лингв.* кәмһетеү …ы; **уничижи́тельный су́ффикс** кәмһетеү суффиксы

**УНИЧТОЖА́ТЬ** *несов. см.* **уничтóжить**

**УНИЧТОЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уничтóжиться 2.** *страд. от* **уничтожа́ть**

**УНИЧТОЖА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **уничтожа́ть 2.** *прил.*; *перен.* (*беспощадный*) һәләкәтле, аяуһыҙ, ҡаты; **уничтожа́ющая кри́тика** аяуһыҙ тәнҡит **3.** *прил.*; *перен.* (*выражающий презрение*) нәфрәтле, күрә алмаҫлыҡ; **уничтожа́ющий взгляд** нәфрәтле ҡараш

**УНИЧТОЖÉНИЕ** *с см.* **уничтóжить** — **уничтожа́ть**; **уничтожéние огневы́х тóчек врага́** дошмандың ут нөктәләрен юҡ итеү

**УНИЧТÓЖИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* юҡ итеү, ҡырыу, һәләк итеү, башына етеү; **уничтóжить пехóту проти́вника** дошмандың йәйәүле ғәскәрен ҡырыу **2.** бөтөрөү, юҡ итеү; **уничтóжить безрабóтицу** эшһеҙлекте бөтөрөү **3.** *кого*; *перен.* (*унизить*) хур итеү, бөтөрөп ташлау, хурлыҡҡа ҡалдырыу; **уничтóжить слóвом** һүҙ менән хур итеү

**УНИЧТÓЖИТЬСЯ** *сов.* бөтөү, ҡырылыу, юҡ булыу, юҡҡа сығыу

**У́НИЯ** *ж*; *в разн. знач.* уния, берләшмә; **полити́ческая у́ния** сәйәси берләшмә; **церкóвная у́ния** сиркәү унияһы

**УНÓС** *м* **1.** *см.* **унести́** — **уноси́ть** 1—3; **2.** *спец.* остағы пар ат (*бер нисә пар атты мисәүләп еккәндә, ғәҙәттә алғылары*)

**УНОСИ́ТЬ** *несов. см.* **унести́**

**УНОСИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **унести́сь 2.** *страд. от* **уноси́ть**

**У́НТЕР-ОФИЦÉР** *м* унтер-офицер (*революцияға тиклем Рәсәй армияһында һәм ҡайһы бер сит ил армияларында кесе командир дәрәжәһе*)

**У́НТЕР-ОФИЦÉРСКИЙ,** -ая, -ое унтер-офицер …ы; **у́нтер-офицéрское зва́ние** унтер-офицер дәрәжәһе

**УНТЫ́** *мн.* (*ед.* **унт** *м*) и **У́НТЫ** *мн.* (*ед.* **у́нта** *ж*) унта (*оҙон ҡуныслы, йомшаҡ табанлы тире итек*)

**У́НЦИЯ** *ж* унция

**УНЫВА́ТЬ** *несов.* бойоғоу, моңайыу, рух (күңел) төшөүе, төшөнкөлөккә бирелеү

**УНЫ́ЛОСТЬ** *ж* бойоҡлоҡ, моңһоулыҡ, рух (күңел) төшөнкөлөгө

**УНЫ́ЛЫЙ,** -ая, -ое бойоҡ, моңһоу, төшөнкө күңелле; **уны́лый человéк** бойоҡ кеше; **уны́лая пéсня** моңһоу йыр; **уны́лый взгляд** моңһоу ҡараш

**УНЫ́НИЕ** *с* күңел (рух) төшөнкөлөгө, күңелһеҙлек, бойоҡлоҡ; **впада́ть в уны́ние** күңел төшөнкөлөгөнә бирелеү

**УНЯ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что* тыйыу, тынысландырыу; **уня́ть детéй** балаларҙы тыйыу **2.** *что* туҡтатыу, баҫыу; **уня́ть слёзы** күҙ йәшен туҡтатыу; **уня́ть волнéние** тулҡынланыуҙы баҫыу

**УНЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** тыйылыу, тынысланыу, тымыу; **дéти уня́лись** балалар тымды **2.** туҡтау, баҫылыу; **ка́шель уня́лся** йүткереү баҫылды

**УПА́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **упа́сть 2.** *прил.* (*о голосе*) хәлһеҙ, көсһөҙ, ишетелер-ишетелмәҫ

**УПА́Д: до упа́ду (упа́да)** *разг.* хәлдән тайғансы, аяҡтан йығылғансы

**УПА́ДОК** *м* **1.** (*спад в развитии*) тарҡалыу, тарҡалыш, түбән төшөү; **упа́док в иску́сстве** сәнғәттең тарҡалыуы **2.** (*ослабление физических сил*) хәл бөтөү, хәлһеҙләнеү; (*духовных сил*) төшөнкөлөк; **упа́док ду́ха** рух төшөнкөлөгө

**УПА́ДОЧНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *книжн.* төшөнкөлөк ...ы, өмөтһеҙлек ...ы, төшөнкөлөк осоро ...ы, төшөнкөлөк осорон сағылдырған; **упа́дочническая литерату́ра** төшөнкөлөк осоро әҙәбиәте

**УПА́ДОЧНИЧЕСТВО** *с*; *книжн.* төшөнкөлөк, өмөтһеҙлек, төшөнкөлөккә (өмөтһеҙлеккә) бирелеү (*ижтимағи тормоштоң берәй өлкәһендә*); **пери́од упа́дочничества в литерату́ре** әҙәбиәттә төшөнкөлөк осоро

**УПА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое тарҡалған, төшөнкө, түбән тәгәрләгән; **упа́дочное предприя́тие** тарҡалған предприятие; **упа́дочное настрое́ние** төшөнкө кәйеф

**УПАКОВА́ТЬ** *сов. что* төргәкләү, (төргәккә) төрөү; **упакова́ть кни́ги** китаптарҙы төргәкләү

**УПАКОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** төргәкләнеү, төргәккә төрөлөү **2.** (*собрать свои вещи*) төрөнөү, йыйыныу, (әйберҙәрҙе) төргәктәргә төрөү

**УПАКО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **упакова́ть** — **упако́вывать 2.** (*упаковочный материал*) (әйбер) төрөү материалы

**УПАКО́ВЩИК** *м* и **УПАКО́ВЩИЦА** *ж* (әйбер) төрөүсе, төрөп бәйләүсе

**УПАКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **упакова́ть**

**УПАКО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упакова́ться 2.** *страд. от* **упако́вывать**

**УПА́РИВАТЬ** *несов. см.* **упа́рить**

**УПА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упа́риться 2.** *страд. от* **упа́ривать**

**УПА́РИТЬ** *сов.* **1.** *что* бешекләү, быуҙа йомшартыу; **упа́рить капу́сту** кәбеҫтәне бешекләү **2.** *кого*; *прост.* (*измучить*) арытыу, ҡара тиргә төшөрөү, аҡ күбеккә батырыу; **бы́строй ездо́й упа́рить коне́й** шәп ҡыуып аттарҙы аҡ күбеккә батырыу

**УПА́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*варясь при помощи пара, дойти до готовности*) быуҙа бешеү; **о́вощи упа́рились** йәшелсә быуҙа бешеп сыкты **2.** *прост.* (*измучиться*) тиргә батыу, ҡара тиргә төшөү, аҡ күбеккә батыу; **упа́риться от бе́га** йүгереп тиргә батыу

**УПА́РХИВАТЬ** *несов. см.* **упорхну́ть**

**УПАСТИ́** *сов. кого-что*; *прост.* һаҡлау, һаҡлап алып ҡалыу, ҡотҡарыу, ҡотҡарып ҡалыу, ҡурсалау ♦ **упаси́ бог**; **бо́же упаси́**: 1) алла һаҡлаһын; 2) алла үҙе һаҡлаһын (*шулай эшләй күрмә, шулай булырға яҙмаһын*)

**УПАСТИ́СЬ** *сов. от кого-что*; *уст.*, *прост.* һаҡланыу, һаҡланып ҡалыу, ҡотолоп ҡалыу; **упасти́сь от гри́ппа** грипптан һаҡланыу

**УПА́СТЬ** *сов. см.* **па́дать** 1, 3, 4, 6; **упа́сть с ло́шади** аттан ҡолау; **звезда́ упа́ла** йондоҙ атылды; **температу́ра у больно́го упа́ла** ауырыуҙың температураһы төшкән; **ко́сы упа́ли на грудь** сәс толомдары күкрәгенә һалынып төшкән; **подозре́ние упа́ло на него́** шөбһә уға төштө; **настрое́ние его́ упа́ло** уның кәйефе төштө ♦ **упа́сть в глаза́х** *кого, чьих* абруйы (дәрәжәһе) төшөү; **упа́сть в о́бморок** иҫтән яҙыу, аңын юғалтыу; **упа́сть ду́хом** рух төшөү; **как с не́ба упа́л** *см.* **не́бо**

**УПЁК** *м*; *спец.* **1.** *см.* **упе́чь** — **упека́ть** 1; **хлеб ночно́го упёка** төндә бешерелгән икмәк **2.** (*уменьшение в весе при выпечке*) (икмәктең) бешкәндә кәмеүе; **проце́нт упёка хле́ба** икмәктең бешкәндә кәмеү проценты

**УПЕКА́ТЬ** *несов. см.* **упе́чь**

**УПЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упе́чься 2.** *страд. от* **упека́ть**

**УПЕРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, во что*; *разг.* терәү, һөйәү, терәп (һөйәп) ҡуйыу; **упере́ть дверь изнутри́** ишекте эс яҡтан терәп ҡуйыу **2.** *перен.*, *разг.* (*о глазах, взгляде*) текләү, текләп ҡарау; **упере́ть взгляд в кни́гу** күҙҙе китапҡа текләү **3.** *см.* **пере́ть** 4

**УПЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *чем, во что* терәлеү, һөйәлеү; **упере́ться шесто́м в дно** ҡолға менән һыу төбөнә терәлеү **2.** *перен.*, *разг.* (*заупрямиться*) киреләнеү, ҡарышыу **3.** *перен.*, *разг.* (*уставить взгляд*) күҙҙе (ҡараште) текәү

**УПЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *что*; *разг.* бешереп еткереү; **хлеб не упечён до конца́** икмәк бешеп етмәгән **2.** *кого-что*; *прост.* олаҡтырыу, ебәреү, һөрөү; **упе́чь в тюрьму́** төрмәгә ебәреү

**УПЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* бешеп етеү, йөҙө килеү, бешеүе етеү; **пиро́г ещё не упёкся** бәлеш бешеп етмәгән әле **2.** (*иметь упёк*) бешеп (бешеүҙән) кәмеү

**УПИВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **упи́ться**

**УПИРА́ТЬ** *несов. см.* **упере́ть**

**УПИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упере́ться 2.** *страд. от* **упира́ть**

**УПИСА́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* яҙып сығыу (бөтөү, һыйҙырыу); **написа́ть заявле́ние на одно́й страни́це** ғаризаны бер биткә яҙып һыйҙырыу **2.** *прост.* һыпырыу, йыпырыу, һыпырып (йыпырып) һалыу; **написа́ть весь пиро́г** бәлеште тотош һыпырып һалыу

**УПИСА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һыйыу, һыйып бөтөү; **письмо́ не написа́лось на двух страни́цах** хат ике биткә һыйып бөтмәне

**УПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **уписа́ть**

**УПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уписа́ться 2.** *страд. от* **упи́сывать**

**УПИ́ТАННОСТЬ** *ж* көрлөк, һимеҙлек

**УПИ́ТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **упита́ть 2.** *прил.* (о человеке) һимеҙ, тулы, таҙа; (*о скоте*) көр, һимеҙ; **упи́танный ребёнок** таҙа бала

**УПИТА́ТЬ** *сов. что* **1.** һимереү, таҙарыу **2.** *перен.* тулыу, тулышыу; **душа́ упи́тана тоско́й** күңел һағыш менән тулған

**УПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *прост.* (*напиться до полного насыщения или допьяна*) иҫергәнсе (ләх булғансы) эсеү **2.** *чем*; *книжн.* ләззәтләнеү, хозурланыу; **упи́ться му́зыкой** музыка менән ләззәтләнеү

**УПЛА́ТА** *ж см.* **уплати́ть** – **упла́чивать**

**УПЛАТИ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* түләү; **уплати́ть нало́г** һалым түләү

**УПЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **уплати́ть**

**УПЛЕСТИ́** *сов.* **1.** *что, чем*; *разг.* үреү, үреп ҡуйыу; **уплести́ ко́су ле́нтами** толомдо таҫма менән үреп ҡуйыу **2.** (*истратить на плетение*) үреп бөтөрөү; **уплести́ всё лы́ко на ла́пти** бөтә йүкәнән сабата үреү **3.** *что*; *прост.* (*быстро съесть*) һыпырыу, йыпырыу, һыпырып һалыу, йыпырып ҡуйыу

**УПЛЕСТИ́СЬ** *сов.*; *прост.* аяҡты саҡ һөйрәп атлау, аяғын ишә баҫып китеү, ишә атлап китеү; **он е́ле уплёлся домо́й** ул аяғын ишә баҫып саҡ ҡайтып китте

**УПЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **уплести́**

**УПЛЕТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уплести́сь** **2.** *страд. от* **уплета́ть**

**УПЛОТНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **уплотни́ть** – **уплотня́ть**, **уплотни́ться** – **уплотня́ться** **2.** (*уплотнившееся место*) ҡаты төйөр, тығыҙланған (ҡатҡан) ер, биҙ **3.** *спец.* тығыҙлағыс (*газ, пар кеҫек матдәләрҙең сығыуын кәметеү өсөн эшләнгән ҡулайлама*)

**УПЛОТНЁННОСТЬ** *ж* тығыҙлыҡ, тығыҙланғанлыҡ; **уплотнённость рабо́чего вре́мени** эш ваҡытының тығыҙлығы

**УПЛОТНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уплотни́ть** **2.** *прил.* тығыҙланған, тығыҙландырылған, тығыҙ; **уплотнённая по́чва** тығыҙланған тупраҡ; **уплотнённый гра́фик рабо́ты** тығыҙ эш графигы

**УПЛОТНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тығыҙландырыу, ҡатҡылландырыу; **уплотни́ть грунт** ерҙе тығыҙландырыу **2.** *кого-что* (*заселить плотнее*) тығыҙлау, тығыҙыраҡ урынлаштырыу; **уплотни́ть кварти́ры горожа́н** ҡалала йәшәүселәрҙең фатирҙарын (торлаҡ майҙанын) тығыҙлау **3.** *что* тығыҙландырыу, тығыҙайтыу, тулыраҡ файҙаланыу; **уплотни́ть рабо́чий день** эш көнөн тығыҙландырыу

**УПЛОТНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать плотнее, твёрже*) тығыҙланыу, ҡатҡылланыу; **по́чва уплотни́лась** ер ҡатҡылланды **2.** (*поместиться более тесно*) тығыҙланыу **3.** (*стать уплотнённым*) тығыҙланыу, тығыҙайыу; **гра́фик экспеди́ций уплотни́лся** экспедициялар графигы тығыҙланды

**УПЛОТНЯ́ТЬ** *несов. см.* **уплотни́ть**

**УПЛОТНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уплотни́ться** **2.** *страд. от* **уплотня́ть**

**УПЛОЩЁННОСТЬ** *ж* яҫылыҡ, йәйенкелек; **уплощённость стопы́** табандың яҫылығы

**УПЛОЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уплощи́ть** **2.** *прил.* яҫыланған, йәйенке, яҫы; **уплощённые побе́ги** йәйенке үҫентеләр

**УПЛОЩИ́ТЬ** *сов.* яҫыландырыу, яҫылатыу, йәйенке (яҫы) итеү

**УПЛОЩИ́ТЬСЯ** *сов.* яҫыланыу, йәйенкеләнеү

**УПЛЫВА́ТЬ** *несов. см.* **уплы́ть**

**УПЛЫ́ТЬ** *сов.* **1.** йөҙөп китеү, ағып китеү; **уплы́ть по тече́нию** ағым ыңғайына йөҙөп китеү **2.** *разг.* (*о времени, событиях*) уҙыу, үтеү, уҙып (үтеп) китеү; **про́шлое уплы́ло безвозвра́тно** үткәндәр кире ҡайтмаҫҡа уҙҙы **3.** *перен., разг.* (*быстро израсходоваться*) юҡ булыу, тотолоп бөтөү; **де́ньги уплы́ли** аҡса тотолоп бөттө

**УПОВА́ТЬ** *несов. на кого-что*; *уст., высок.* өмөтләнеү, өмөт итеү, өмөт (ышаныс) бағлау; **упова́ть на успе́х** уңышҡа өмөт бағлау

**УПОДО́БИТЬ** *сов. кого-что, кому-чему* оҡшатыу, сағыштырыу, тиңләштереү; **уподо́бить мо́лодость весне́** йәшлекте яҙға оҡшатыу

**УПОДО́БИТЬСЯ** *сов. кому-чему* оҡшау, оҡшап китеү, оҡшаш булыу

**УПОДОБЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **уподо́бить** – **уподобля́ть**, **уподо́биться** – **уподобля́ться** **2.** *лит.* (*сравнение*) оҡшашлыҡ, оҡшаш булыу

**УПОДОБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **уподо́бить**

**УПОДОБЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уподо́биться** **2.** *страд. от* **уподобля́ть**

**УПОЕ́НИЕ** *с* ләззәт, рәхәт(лек), хозур(лыҡ); **рабо́тать с упое́нием** ләззәт менән эшләү

**УПОЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **упои́ть** **2.** *прил.* ләззәтле, хозур, хозурланған, -ға/-гә иҫергән; **упоённый взгляд** хозур ҡараш

**УПОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ләззәтләндергес, иҫерткес, иҫ киткес; **упои́тельный во́здух** иҫерткес һауа; **упои́тельная пе́сня** иҫ киткес йыр

**УПОИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *прост.* ныҡ иҫертеү, лаяҡыл булғансы эсереү **2.** *чем* һоҡландырыу, хозурландырыу

**УПОКО́Й: за упоко́й (души́)** *кого*; *церк.* әруахтар рухына

**УПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **уползти́**

**УПОЛЗТИ́** *сов.* **1.** шыуышып китеү (китеп барыу); **змея́ уползла́** йылан шыуышып китте **2.** (*медленно уйти*) әкрен генә китеү, шылыу; **неприя́тель упо́лз за лес** дошман урман арьяғына шылды

**УПОЛНОМО́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уполномо́чить** **2.** *в знач. сущ.* **уполномо́ченный** *м* и **уполномо́ченная** *ж* вәкил

**УПОЛНОМО́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **уполномо́чить**

**УПОЛНОМО́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **уполномо́чивать**

**УПОЛНОМО́ЧИЕ: по уполномо́чию** *кого-чего кемдеңдер-нимәнеңдер* вәкәләте буйынса

**УПОЛНОМО́ЧИТЬ** *сов. на что* вәкәләт биреү, вәкил итеп ебәреү (ҡуйыу), ышанып эш тапшырыу; **уполномо́чить на веде́ние де́ла** эште алып барыу өсөн вәкәләт биреү

**УПОМИНА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **упомина́ть** **2.** телгә (иҫкә) алыныу, исеме аталыу; **упомина́ние в печа́ти** матбуғатта телгә алыныу

**УПОМИНА́ТЬ** *несов. см.* **упомяну́ть**

**УПО́МНИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* хәтерҙә (иҫтә) ҡалдырыу, хәтерҙә һаҡлау, иҫтә тотоу, онотмау; **упо́мнить слова́ пе́сни** йырҙың һүҙҙәрен иҫтә ҡалдырыу

**УПОМЯНУ́ТЬ** *сов. кого-что, о ком-чём* или *с союзом "что"* телгә (иҫкә) алыу, исемен атау, ҡағылып (әйтеп, иҫкә төшөрөп) китеү; **упомяну́ть и́мя дру́га** дуҫтың исемен телгә алыу

**УПО́Р** *м* **1.** *см.* **упере́ть** — **упира́ть** 1, **упере́ться** — **упира́ться** 1; **то́чка упо́ра** таяныу (терәк) нөктәһе; **завинти́ть до упо́ра** ныҡытып бороп ҡуйыу **2.** (*подпорка*) терәк, терәгес, таяныс, типке; **упо́р для ног** аяҡтар өсөн терәгес; **наложи́ть упо́р на дверь** ишеккә типке һалыу ♦ **в упо́р подойти́** йөҙгә-йөҙ (ҡара-ҡаршы) килеп баҫыу; **в упо́р вы́стрелить (уби́ть)** терәп атыу (атып үлтереү); **в упо́р сказа́ть** туп-тура әйтеү; **в упо́р смотре́ть** туп-тура ҡарау, текләү, күҙен алмай ҡарау; **упо́р де́лать** *на кого-что*, *на ком-чём* баҫым яһау, айырым рәүештә иғтибарҙы йүнәлтеү

**УПО́РНЫЙ I,** -ая, -ое *спец.* терәк ...ы, терәү ...ы; **упо́рный болт** терәү болты; **упо́рный шест** терәк таяуы

**УПО́РНЫЙ II,** -ая, -ое **1.** (*настойчивый*) үҙ һүҙле, ныҡыш, ныҡымыш, еңмеш; **упо́рный челове́к** ныҡымыш кеше **2.** (*требующий выдержки*) ҡаты, киҫкен, ныҡышмалы, көсөргәнешле; **упо́рная борьба́** ҡаты көрәш; **упо́рный труд** көсөргәнешле хеҙмәт **3.** *перен.* (*не прекращающийся*) туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ, бөтмәҫ; **упо́рный ка́шель** туҡтауһыҙ йүтәл; **упо́рное жела́ние** бөтмәҫ теләк

**...УПО́РНЫЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "бирешмәүсән", "сыҙамлы" мәғәнәләрен аңлатҡан икенсе өлөшө, мәҫ.*, **водоупо́рный** һыуға бирешмәүсән; **огнеупо́рный** утҡа сыҙамлы

**УПО́РСТВО** *с* **1.** (*настойчивое стремление к чему-л.*) ныҡышмалылыҡ, ныҡышлыҡ, ныҡлыҡ **2.** (*упрямство*) үҙһүҙлелек, кирелек, тиҫкәрелек

**УПО́РСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** ныҡышыу, ныҡ тороу, ҡаты тороу, ныҡлыҡ (ныҡышмалылыҡ) күрһәтеү; **упо́рствовать не сто́ит** ныҡ тороуҙың кәрәге юҡ **2.** *в чём* үҙһүҙләнеү, киреләнеү, ҡарышыу, тиҫкәреләнеү; **упо́рствовать в свои́х тре́бованиях** үҙ талаптарың менән ҡарышыу, үҙһүҙләнеү

**УПОРХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** (*вспорхнув, улететь*) пырхылдап (пырылдап) осоп китеү; **пти́чка упорхну́ла** ҡошсоҡ пырылдап осоп китте **2.** *разг.* (*быстро удалиться*) ҡапыл (йүгереп, осоп тигәндәй, еңел атлап) сығып китеү; **де́вушка упорхну́ла из ко́мнаты** ҡыҙ бүлмәнән осоп тигәндәй сығып китте

**УПОРЯ́ДОЧЕНИЕ** *с см.* **упоря́дочить**

**УПОРЯ́ДОЧЕННОСТЬ** *ж* тәртипкә килтерелгәнлек (килтерелгән булыу), яйға (тәртипкә) һалынғанлыҡ

**УПОРЯ́ДОЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **упоря́дочить 2.** *прил.* тәртипкә килтерелгән (һалынған)

**УПОРЯ́ДОЧИВАТЬ** *несов. см.* **упоря́дочить**

**УПОРЯ́ДОЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упоря́дочиться 2.** *страд. от* **упоря́дочивать**

**УПОРЯ́ДОЧИТЬ** *сов. что* тәртипкә килтереү, рәткә (яйға, юлға, көйгә) һалыу; **упоря́дочить рабо́ту тра́нспорта** транспорт эшен рәткә һалыу

**УПОРЯ́ДОЧИТЬСЯ** *сов.* тәртипкә килеү, рәткә (яйға, юлға, көйгә) һалыныу; **отноше́ния упоря́дочились** мөнәсәбәттәр яйға һалынды

**УПОТРЕБИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ҡулланылыш, ҡулланыш, ҡулланыу дәрәжәһе; **употреби́тельность проду́кции** продукцияның ҡулланышы

**УПОТРЕБИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое киң ҡулланышлы, киң ҡулланыла торған; **широко́ употреби́тельное сло́во** киң ҡулланышлы һүҙ

**УПОТРЕБИ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡулланыу, файҙаланыу; **употреби́ть свобо́дное вре́мя на чте́ние книг** буш ваҡытты китап уҡыуға файҙаланыу

**УПОТРЕБИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡулланыу, тотолоу, файҙаланыу; **это сло́во употреблено́ в друго́м значе́нии** был һүҙ икенсе мәғәнәлә ҡулланылған

**УПОТРЕБЛЕ́НИЕ** *с см.* **употреби́ть** — **употребля́ть**, **употреби́ться** — **употребля́ться**; **быть в употребле́нии** ҡулланышта булыу

**УПОТРЕБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **употреби́ть**

**УПОТРЕБЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **употреби́ться 2.** *страд. от* **употребля́ть**

**УПРА́ВА** *ж* **1.** *разг.* буйһондороусы сара, йүгәнләүсе көс, буйһондороу (йүгәнләү) сараһы (көсө, әмәле, юлы); **найти́ упра́ву** буйһондороусы сара табыу **2.** *ист.* идаралыҡ, управа (*революцияға тиклем Рәсәйҙә ҡайһы бер йәмғәтселек, бай ҡатлам, хакимиәт эштәре менән шөғөлләнеүсе учреждениелар исеме*); **зе́мская упра́ва** земство идаралығы

**УПРАВДЕЛА́МИ** *м нескл.* (*управляющий делами*) управделами (*эштәр менән идара итеүсе*)

**УПРАВДО́М** *м* (*управляющий домами*) управдом (*йорттар менән идара итеүсе*)

**УПРАВИ́ТЕЛЬ** *м*; *уст. см.* **управля́ющий** 2

**УПРА́ВИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** *с чем* и *без доп.* башҡарыу, башҡарып сығыу, тамамлау, бөтөрөү, алып барып сығарыу; **упра́виться с хозя́йством** хужалыҡ эштәрен башҡарып сығыу; **упра́виться с ремо́нтом до́ма** өйгә ремонт яһауҙы бөтөрөү **2.** *с кем* (*одолеть, заставить повиноваться*) көс етеү, еңеп сығыу, өҫтөн сығыу, буйһондороу; **упра́виться с непослу́шными ученика́ми** тыңламаған уҡыусыларҙы еңеп сығыу

**УПРАВЛЕ́НЕЦ** *м*; *разг.* идара эшсеһе, идара хеҙмәткәре

**УПРАВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **управля́ть** 1, 2; **нау́ка управле́ния** идара итеү фәне; **ме́тоды госуда́рственного управле́ния** дәүләттең идара итеү саралары **2.** идаралыҡ, идара; **городско́е доро́жное управле́ние** ҡала юл идаралығы **3.** (*совокупность приборов и механизмов*) идара итеү; **автомати́ческое управле́ние** автоматик идара итеү;

**рулево́е управле́ние** руль менән идара итеү **4.** *грам.* башҡарылыу; **предло́жное управле́ние** предлогтар менән башҡарылыу ♦ **теря́ть управле́ние** (*о самолёте, снаряде и т.п.*) идара итеүҙе юғалтыу, идара итеү мөмкинлеге боҙолоу

**УПРАВЛЕ́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое идара итеү ...ы; **управле́нческий аппара́т** идара итеү аппараты

**УПРАВЛЯ́ЕМОСТЬ** *ж* идара ителеш; **сохрани́ть управля́емость самолёта** самолёттың идара ителешен һаҡлау

**УПРАВЛЯ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **управля́ть 2.** *прил.* идара ителмәле, идара ителә торған; **управля́емая раке́та** идара ителмәле ракета

**УПРАВЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *кем-чем* идара итеү, йөрөтөү; **управля́ть автомоби́лем** автомобиль йөрөтөү **2.** *чем-кем* (*руководить*) етәкселек (идара) итеү, алып барыу; **управля́ть страно́й** илгә етәкселек итеү; **управля́ть хозя́йством** хужалыҡ менән идара итеү; **управля́ть орке́стром** оркестрға етәкселек итеү **3.** *чем*; *грам.* башҡарылыу; **управля́ть да́тельным падежо́м** төбәү килеш менән башҡарылыу

**УПРАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упра́виться 2.** *страд. от* **управля́ть**

**УПРАВЛЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **управля́ть 2.** *в знач. сущ.* **управля́ющий** *м* идара итеүсе, управляющий (*берәй хужалыҡҡа, учреждениеға һ.б.*)

**УПРАЖНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **упражня́ть** — **упражня́ться**; **гимнасти́ческие упражне́ния** гимнастика күнегеүҙәре **2.** (*учебное задание*) күнегеү, күнекмә; **сбо́рник упражне́ний по правописа́нию** дөрөҫ яҙыу буйынса күнегеүҙәр йыйынтығы

**УПРАЖНЯ́ТЬ** *несов. кого-что* күнектереү, өйрәтеү, күнегеүҙәр үткәреү, күнекмәләр биреү; **упражня́ть па́мять** хәтерҙе күнектереү; **упражня́ть соба́ку** этте өйрәтеү

**УПРАЖНЯ́ТЬСЯ** *несов. в чём, на чём, с чем* и *без доп.* үҙ-үҙеңде күнектереү, күнегеүҙәр үткәреү (һәү); **упражня́ться на гармо́ни** гармунда күнегеүҙәр үткәреү

**УПРАЗДНИ́ТЬ** *сов. что* юҡҡа сығарыу, юҡ итеү, кире ҡағыу, бөтөрөү, ябыу; **упраздни́ть министе́рство** министрлыкты бөтөрөү

**УПРАЗДНИ́ТЬСЯ** *сов.* юҡҡа сығыу, юҡ ителеү, бөтөү, ябылыу

**УПРАЗДНЯ́ТЬ** *несов. см.* **упраздни́ть**

**УПРАЗДНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упраздни́ться 2.** *страд. от* **упраздня́ть**

**УПРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **упроси́ть**

**УПРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **упре́ть**

**УПРЁК** *м* шелтә, үпкә; **сде́лать дру́жеский упрёк** дуҫтарса шелтә һәү ♦ **бро́сить упрёк** үпкә белдереү; **ста́вить в упрёк** *кому, что* ғәйепләү, ғәйепкә һанау

**УПРЕКА́ТЬ** *несов. кого-что* шелтәләү, баҫым һәү, үпкә белдереү; **упрека́ть дру́га в не́искренности** дуҫҡа ихласһыҙлығы өсөн үпкә белдереү

**УПРЕКНУ́ТЬ** *сов. см.* **упрека́ть**

**УПРЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* парланып бешеү (бешеп сығыу), үҙ парына бешеп етеү; **ка́ша упре́ла** бутҡа парланып бешеп сыҡты

**УПРОСИ́ТЬ** *сов. кого-что* и *с неопр.* үтенеп ризалығын алыу, инәлеү, күндереү; **упроси́ть погости́ть** ҡунаҡ булырға күндереү

**УПРОСТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ябайлаштырыу, еңелләштереү, анһатлаштырыу; **упрости́ть констру́кцию** ҡоролманы ябайлаштырыу **2.** (үтә) ябайлаштырып ебәреү, ярлыландырыу; **упрости́ть отноше́ния** мөнәсәбәттәрҙе ябайлаштырып ебәреү

**УПРОСТИ́ТЬСЯ** *сов.* ябайлашыу, еңеләшеү; **рабо́та упрости́лась** эш ябайлашты

**УПРО́ЧЕНИЕ** *с см.* **упро́чить**, **упро́читься**; **упро́чение ми́ра** тыныслыҡты нығытыу

**УПРО́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **упро́чить**

**УПРО́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упро́читься 2.** *страд. от* **упро́чивать**

**УПРО́ЧИТЬ** *сов. что* **1.** нығытыу; **упро́чить мир** тыныслыҡты нығытыу **2.** *за кем* раҫлау, нығытыу; **карти́ны упро́чили за ним сла́ву кру́пного худо́жника** картиналары уның ҙур рәссам булыуын раҫланы

**УПРО́ЧИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*занять прочное положение*) нығыныу, ныҡлап урын алыу (урынлашып алыу); **упро́читься на но́вых пози́циях** яңы позицияларҙа ныҡлап урынлашып алыу **2.** (*стать прочным*) нығыныу; **междунаро́дная обстано́вка упро́чилась** халыҡ-ара хәл нығыны **3.** *за кем* алыу, таралыу, ныҡлап урынлашыу (*исем, дан*); **за ним упро́чился авторите́т первокла́ссного то́каря** уның юғары класлы токарь тигән абруйы ныҡлап урынлашты

**УПРОЧНИ́ТЬ** *сов. что* нығытыу, нығындырыу, бешектереү, сыҙамлы итеү; **упрочни́ть древеси́ну** үҙағасты бешектереү

**УПРОЧНИ́ТЬСЯ** *сов.* нығыныу

**УПРОЧНЯ́ТЬ** *несов. см.* **упрочни́ть**

**УПРОЧНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упрочни́ться 2.** *страд. от* **упрочня́ть**

**УПРОЩА́ТЬ** *несов. см.* **упрости́ть**

**УПРОЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упрости́ться 2.** *страд. от* **упроща́ть**

**УПРОЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **упрости́ть** — **упроща́ть**, **упрости́ться** — **упроща́ться 2.** ябайлаштырыу, ябайлыҡ индереү; **внести́ упроще́ния в сло́жный механи́зм** ҡатмарлы механизмды ябайлаштырыу

**УПРОЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **упрости́ть 2.** *прил.* (*несложный*) ябайлаштырылған, еңеләйтелгән; **упрощённая орфогра́фия** ябайлаштырылған орфография **3.** *прил.* (*примитивный, поверхностный*) үтә ябай, ярлы, примитив; **упрощённое представле́ние** үтә ябай күҙаллау

**УПРОЩЕ́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое үтә ябай, үтә ябайлаштырылған; **упроще́нческий подхо́д к реше́нию вопро́са** мәсьәләне хәл итеүгә үтә ябайлаштырылған ҡараш

**УПРОЩЕ́НЧЕСТВО** *с* үтә ябайлаштырыу, еңелсә ҡарау; **борьба́ с упроще́нчеством в иску́сстве** сәнғәттәге үтә ябайлаштырыуға ҡаршы көрәш

**УПРУ́ГИЙ,** -ая, -ое **1.** һығылмалы, һығылыусан; **упру́гая пружи́на** һығылмалы пружина **2.** (*тугой*) тығыҙ; **упру́гий мяч** тығыҙ туп; **упру́гое те́ло** тығыҙ тән **3.** (*пружинистый*) һығылмалы; **упру́гая похо́дка** һығылмалы атлау

**УПРУ́ГОСТЬ** *ж* **1.** һығылмалылыҡ, һығылыусанлыҡ; **упру́гость пружи́ны** пружинаның һығылмалылығы **2.** тығыҙлыҡ; **упру́гость те́ла** тәндең тығыҙлығы **3.** һығылмалылыҡ; **упру́гость движе́ний** хәрәкәттәрҙең һығылмалылығы

**УПРЯ́ЖКА** *ж* **1.** (бер) егем; **упря́жка лошаде́й** бер егем аттар; **оле́нья упря́жка** боландар егеме **2.** *см.* **у́пряжь** ♦ **(быть) в одно́й упря́жке** бергә егелеп, иңгә-иң терәп

**УПРЯЖНО́Й,** -ая, -ое **1.** (ат) егеү ...ы; **упряжны́е принадле́жности** егеү кәрәк-ярағы **2.** еген, екке; **упряжна́я ло́шадь** еген ат

**У́ПРЯЖЬ** *ж* егеү кәрәк-ярағы, ҡамыт-дуға

**УПРЯ́МЕЦ** *м* и **УПРЯ́МИЦА** *ж*; *разг.* кире (кеҙе, тиҫкәре) кеше, ҡарышҡаҡ кеше

**УПРЯ́МИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* кireләнеү, кеҙеләнеү, тиҫкәреләнеү, ҡарышыу; (*о лошади*) сығынлау

**УПРЯ́МСТВО** *с* **1.** үҙһүҙлелек, ныҡышлыҡ, ныҡышмалыҡ **2.** кирелек, тиҫкәрелек, кеҙелек

**УПРЯ́МСТВОВАТЬ** *несов. см.* **упря́миться**

**УПРЯ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*настойчивый*) үҙ һүҙле, ныҡышмал, ныҡыш **2.** (*несговорчивый*) кире, тиҫкәре, кеҙе, ҡарышмал

**УПРЯ́ТАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** (*спрятать*) йәшереп (йыйып) ҡуйыу; **упря́тать ве́щи в сунду́к** әйберҙәрҙе һандыҡҡа йыйып ҡуйыу; **упря́тать спи́чки от дете́й** шырпыны балаларҙан йәшереп ҡуйыу **2.** *перен.* ябыу, тығыу, ябып (тығып) ҡуйыу; **упря́тать в тюрьму́** төрмәгә ябып ҡуйыу

**УПРЯ́ТАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ныҡ йәшеренеү, ҡасыу

**УПРЯ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **упря́тать**

**УПРЯ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **упря́таться** **2.** *страд. от* **упря́тывать**

**УПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **упусти́ть**

**УПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ысҡындырыу, ысҡындырып (төшөрөп) ебәреү; **упусти́ть арка́н** арҡанды ҡулдан ысҡындырыу **2.** *кого-что* (*дать возможность уйти и т.п.*) тота (эләктерә) алмау, ысҡындырыу, ысҡындырып ебәреү; **упусти́ть ры́бу с крючка́** балыҡты ҡармаҡтан ысҡындырып ебәреү **3.** *что* ысҡындырыу, ебәреү, файҙалана алмай ҡалыу; **упусти́ть удо́бный слу́чай** уңайлы осраҡты файҙалана алмай ҡалыу

**УПУЩЕ́НИЕ** *с* **1.** (*пропуск чего-л.*) кәмселек, етешһеҙлек **2.** (*недосмотр, ошибка*) күреп еткермәү, иғтибарһыҙлыҡ, яңылышлыҡ; **замеча́ть свои́ упуще́ния** үҙеңдең яңылышлыҡтарыңды күреү

**УПЫ́РЬ** *м* убыр, өрәк

**УРА́** *межд.* ура ♦ **на ура́**: 1) *воен.* ура ҡысҡырыу (менән); 2) дәррәү, бер тауыштан; **предложе́ние при́нято на ура́** тәҡдимде бер тауыштан ҡабул итеү; 3) осраҡлы (еңел) уңыш; **наде́яться на ура́** осраҡлы уңышҡа ышаныу

**УРАВНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **уравня́ть** — **уравня́ться** **2.** *мат.* тигеҙләмә; **квадра́тное уравне́ние** квадратлы тигеҙләмә

**УРА́ВНИВАТЬ I** *несов. см.* **уравня́ть**

**УРА́ВНИВАТЬ II** *несов. см.* **уровня́ть**

**УРА́ВНИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **уравня́ться** **2.** *страд. от* **ура́внивать** I

**УРА́ВНИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **уровня́ться** **2.** *страд. от* **ура́внивать** II

**УРАВНИ́ЛОВКА** *ж*; *разг.* тигеҙләүселек

**УРАВНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *спец.* тигеҙләү ...ы, тигеҙләй торған, тигеҙләүсе; **уравни́тельный прибо́р** тигеҙләү приборы **2.** тигеҙләүселек ...ы; **уравни́тельный нало́г** тигеҙләүселек һалымы

**УРАВНОВЕ́СИТЬ** *сов. что* **1.** тигеҙләү; **уравнове́сить ча́шки весо́в** үлсәү тәрилкәләрен тигеҙләү **2.** *перен.* тигеҙләштереү, бер тигеҙ итеү; **уравнове́сить си́лы** көстәрҙе тигеҙләштереү

**УРАВНОВЕ́СИТЬСЯ** *сов.* **1.** тигеҙләнеү, тигеҙ(лек) булыу **2.** *перен.* тигеҙләшеү, тиңләшеү

**УРАВНОВЕ́ШЕННОСТЬ** *ж* баҫалҡылыҡ, һапалылыҡ, баҫалҡы (һапалы) булыу; **уравнове́шенность хара́ктера** баҫалҡы холоҡло булыу

**УРАВНОВЕ́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уравнове́сить**; **уравнове́шенные ча́ши весо́в** тигеҙләшкән үлсәү тәрилкәләре **2.** *прил.* баҫалҡы, һапалы; **уравнове́шенный челове́к** һапалы кеше

**УРАВНОВЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **уравнове́сить**

**УРАВНОВЕ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уравнове́ситься** **2.** *страд. от* **уравнове́шивать**

**УРАВНЯ́ТЬ** *сов. кого-что* (*по величине, размеру и т.п.*) тигеҙләү, бер тигеҙ (тиң) итеү; (*в правах, положении и т.п.*) тигеҙләү, тигеҙләштереү, тиңләштереү; **уравня́ть в права́х** хоҡуҡтарҙы тигеҙләү

**УРАВНЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тигеҙләнеү, бер тигеҙ (тиң) булыу **2.** тигеҙләшеү, тиңләшеү

**УРАГА́Н** *м* көслө дауыл, ғәрәсәт, ҡойон

**УРАГА́ННЫЙ,** -ая, -ое *прям.*, *перен.* ҡойон бик көслө, ғәрәсәтле, емергес; **урага́нный ве́тер** бик көслө ел; **урага́нный ого́нь** ут ҡойоно

**УРАЗУМЕВА́ТЬ** *несов. см.* **уразуме́ть**

**УРАЗУМЕВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **уразумева́ть**

**УРАЗУМЕ́НИЕ** *с см.* **уразуме́ть**

**УРАЗУМЕ́ТЬ** *сов. что* аңлау, төшөнөү, аңлап (төшөнөп) алыу; **уразуме́ть, в чём де́ло** эштең нимәлә икәнен аңлап алыу

**УРА́Н** *м* уран (*химик элемент, металл*)

**УРА́НОВЫЙ,** -ая, -ое уран ...ы; **ура́новая руда́** уран мәғдәне; **ура́новые месторожде́ния** уран ятҡылыҡтары

**УРБАНИЗА́ЦИЯ** *ж* урбанизация (*иҡтисади һәм мәҙәни тормоштоң эре ҡалаларҙа туплананыуы*)

**УРБАНИ́ЗМ** *м* урбанизм (**1.** *хәҙерге эре ҡалаларҙың тормошон сәнғәттә һәм әҙәбиәттә һүрәтләү* **2.** *эре йортло гигант-ҡалалар һалыу зарурлығын яҡлаусы йүнәлеш*)

**УРБАНИ́СТ** *м* урбанист (*урбанизм яҡлы кеше*)

**УРБАНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое урбанистик, урбанизмға хас (булған); **урбанисти́ческая му́зыка** урбанистик музыка

**УРВА́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* **1.** (*оторвать, вырвать для себя*) тартып алыу; (*зубами*) тешләп алыу **2.** *перен.* (*добыть не вполне честным способом*) ҡулға төшөрөү, эләктереү; **урва́ть де́нег** ҡулға аҡса төшөрөү **3.** *перен.* (*с трудом выделить время*) бүлеү, табыу; **урва́ть вре́мя** ваҡыт бүлеү

**УРЕГУЛИ́РОВАНИЕ** *с см.* **урегули́ровать**; **урегули́рование междунаро́дных отноше́ний** халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыу

**УРЕГУЛИ́РОВАТЬ** *сов. что* яйға (рәткә, тәртипкә) һалыу, яйлау, көйләү, хәл итеү; **урегули́ровать спо́рные вопро́сы** бәхәсле мәсьәләләрҙе яйлау; **урегули́ровать де́нежные дела́** аҡса эштәрен хәл итеү

**УРЕГУЛИ́РОВАТЬСЯ** *сов.* яйға (рәткә, тәртипкә) һалыныу, яйланыу, көйләнеү, хәл ителеү

**УРЕ́ЗАТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* ҡыҫҡартыу, ҡырҡып кәметеү (киҫерәйтеү); **уре́зать по́лы пальто́** пальтоның салғыйын ҡыҫҡартыу **2.** әҙәйтеү, кәметеү, кесерәйтеү, ҡыҫҡартыу, ҡыҫыу; **уре́зать расхо́ды** сығымдарҙы кәметеү

**УРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **уре́зать**

**УРЕЗО́НИВАТЬ** *несов. см.* **урезо́нить**

**УРЕЗО́НИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **урезо́нивать**

**УРЕЗО́НИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* күндереү, ышандырыу, дүндереү; **урезо́нить непослу́шного ма́льчика** тыңлауһыҙ малайҙы дүндереү

**УРЕ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **уреза́ть**

**УРЕ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **уре́зывать**

**УРЕМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *мед.* уремия ...ы; **уреми́ческое заболева́ние** уремия ауырыуы

**УРЕМИ́Я** *ж*; *мед.* уремия (*бөйөр һәм бәүел юлдарының ауырыуы*)

**УРЕ́ТРА** *ж*; *анат.* бәүел юлы

**УРЕТРИ́Т** *м*; *мед.* бәүел юлының ауырыуы

**УРЕТРОСКО́П** *м*; *мед.* уретроскоп (*бәүел юлын тикшерә торған оптик прибор*)

**УРИ́НА** *ж*; *мед.* бәүел, кесе ярау

**УРИНОТЕРАПИ́Я** *ж* уринотерапия

**У́РНА** *ж* урна (**1.** *яндырылған мәйет көлөн һаҡлау өсөн махсус һауыт* **2.** *һайлау бюллетендәрен төшөрә торған махсус йәшник* **3.** *урамдарҙа ҡуйыла торған сүп-сар һауыты*)

**У́РОВЕНЬ** *м* **1.** (*высота стояния воды*) кимәл, типһән; **у́ровень воды́ в реке́** йылғаның һыу кимәле **2.** (*ступень в развитии чего-л.*) кимәл, дәрәжә; **культу́рный у́ровень** мәҙәниәт кимәле; **у́ровень разви́тия** үҫеш кимәле **3.** *см.* **ватерпа́с** ♦ **в у́ровень** *с чем* бергә, бер ағымдан, бер һулыштан; **на у́ровне** тейешле юғарылыҡта (кимәлдә), тулыһынса ҡәнәғәтләнерлек

**УРОВНЯ́ТЬ** *сов. что* тигеҙләү, тигеҙ итеү; **уровня́ть доро́гу** юлды тигеҙләү

**УРОВНЯ́ТЬСЯ** *сов.* тигеҙләнеү, тигеҙ булыу; **доро́га уровня́лась** юл тигеҙләнде

**УРО́Д** *м* **1.** ғәрип, зәғиф (*кеше*) **2.** *разг.* (*человек с некрасивой внешностью*) нишана, йәмһеҙ, шөкәтһеҙ, килбәтһеҙ, күркһеҙ **3.** (*человек с дурными свойствами характера*) боҙоҡ, эшәке кеше

**УРО́ДИНА** *м* и *ж*; *разг. см.* **уро́д**

**УРОДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* уңыш биреү, уңдырыу, емеш биреү; **земля́ хорошо́ уроди́ла** ер мул уңыш бирҙе **2.** *кого*; *разг.* тыуҙырыу, бала табыу

**УРОДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*созреть, вырасти*) уңыш биреү, уңыу, өлгөрөү **2.** *разг.* (*родиться*) тыуыу **3.** *в кого*; *разг.* (оҡшап) тыуыу; **уроди́ться в де́душку** олатаһына оҡшап тыуыу

**УРО́ДЛИВОСТЬ** *ж* **1.** (*физический недостаток*) зәғифлек, ғәриплек **2.** (*безобразность*) йәмһеҙлек, шөкәтһеҙлек, килбәтһеҙлек, күркһеҙлек; **уро́дливость лица́** йөҙҙөң йәмһеҙлеге **3.** *обычно мн.*; *перен.* (*ненормальность явления*) боҙоҡлоҡ, эшәкелек; **уро́дливость пья́нства** эскелектең эшәкелеге

**УРО́ДЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*с физическим недостатком*) ғәрип, зәғиф; **уро́дливая рука́** зәғиф ҡул **2.** (*безобразный*) йәмһеҙ, шөкәтһеҙ, килбәтһеҙ, күркһеҙ, нишана; **уро́дливая вне́шность** шөкәтһеҙ ҡиәфәт **3.** *перен.* (*ненормальный, искажённый*) боҙоҡ, яңылыш; **уро́дливое воспита́ние** боҙоҡ тәрбиә

**УРО́ДОВАТЬ** *несов. кого-что* **1.** (*калечить*) ғәрипләү, зәғифләү, имгәтеү; **уро́довать люде́й** кешеләрҙе имгәтеү **2.** (*обезображивать*) йәмһеҙләү, боҙоу; **о́спа уро́дует лицо́** сәсәк ауырыуы йөҙҙө йәмһеҙләй **3.** *перен.* (*извращать, искажать*) боҙоу; **уро́довать мысль** *чью-л.* *кемдеңдер* фекерен боҙоу; **плохи́м воспита́нием уро́довать ребёнка** насар тәрбиә менән баланы боҙоу

**УРО́ДОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **уро́довать**

**УРО́ДСКИЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **уро́дливый**

**УРО́ДСТВО** *с* **1.** (*физический недостаток*) зәғифлек, ғәриплек **2.** (*безобразная внешность*) йәмһеҙлек, шөкәтһеҙлек, килбәтһеҙлек, күркһеҙлек, шыҡһыҙлыҡ **3.** *перен.* боҙоҡлоҡ, боҙоҡ булыу, яңылышлыҡ, яңылыш булыу; **уро́дство воспита́ния** тәрбиәнең боҙоҡлоғо; **нра́вственное уро́дство** әхлаҡи боҙоҡлоҡ

**УРОЖА́Й** *м* **1.** уңыш; **оби́льный урожа́й** мул уңыш **2.** (*изобилие зерна, плодов и т.п.*) мул уңыш, муллыҡ, мул булыу **3.** (*изобилие вообще*) күплек, күп булыу; **урожа́й на неве́ст** кәләштәрҙең күплеге

**УРОЖА́ЙНОСТЬ** *ж* уңдырышлылыҡ, уңдырыш; **подня́ть урожа́йность поле́й** баҫыуҙарҙың уңдырышлылығын күтәреү

**УРОЖА́ЙНЫЙ,** -ая -ое **1.** уңыш ...ы **2.** уңдырышлы, мул уңыш алған, уңыш мул булған; **урожа́йный год** уңдырышлы йыл **3.** уңа торған, мул уңыш бирә торған; **урожа́йный сорт** мул уңыш бирә торған сорт

**УРОЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уроди́ть 2.** *прил.* **урождённая** (*о девичьей фамилии замужней женщины*) ҡыҙ ваҡытындағы, тыумыштағы

**УРОЖЕ́НЕЦ** *м* и **УРОЖЕ́НКА** *ж* -да/-дә тыуған (кеше), тыуған ере; **уроже́нец Уфы́** Өфөлә тыуған

**УРО́К** *м* **1.** дәрес; **уро́к родно́го языка́** туған тел дәресе; **гото́вить уро́к** дәрес әҙерләү; **быть на уро́ке** дәрестә булыу **2.** (*вывод, знания, полезные в будущем*) һабаҡ, ғибрәт, фәһем; **уро́ки исто́рии** тарих һабаҡтары; **послужи́ть уро́ком** һабаҡ булыу ♦ **брать уро́ки** *чего* дәрестәр алыу (*мәктәпкә йөрөмәйенсә шәхси рәүештә уҡыу*); **дава́ть уро́ки**: 1) дәрестәр биреү, уҡытыу; 2) шәхси рәүештә аҡсаға уҡытыу; **дать уро́к** һабаҡ биреү

**УРО́ЛОГ** *м* уролог (*урология белгесе*)

**УРОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое урология ...ы; **урологи́ческий кабине́т** урология кабинеты

**УРОЛО́ГИЯ** *ж* урология (*медицинаның енес-бәүел ағзаларының сирҙәрен өйрәнә торған бүлеге*)

**УРО́Н** *м* зыян, зарар, юғалтыу; **нанести́ уро́н** зыян килтереү; **потерпе́ть уро́н** зарар күреү

**УРОНИ́ТЬ** *сов. см.* **роня́ть** 1, 3—5; **урони́ть ключи́** аҡсыстарҙы төшөрөп ебәреү; **урони́ть го́лову** башты һалындырыу

**УРО́ЧИЩЕ** *с* **1.** (*природная межа*) тәбиғи сик, тәбиғи ыҙан, билдә (*тау, йылға, урман*) **2.** (*участок, отличающийся от остальной местности*) айырылып торған урын

**УРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*определённый, обычный*) билдәләнгән, тейешле, килешелгән, ғәҙәттәге; **прийти́ в уро́чный час** билдәләнгән сәғәттә килеү **2.** дәрес ...ы; **уро́чное вре́мя** дәрес ваҡыты

**УРУГВА́ЙЦЫ** *мн.* уругвайҙар, уругвай халҡы // *ед.* **уругва́ец** *м* уругвай ир-аты; **уругва́йка** *ж* уругвай ҡатын-ҡыҙы

**УРЧА́НИЕ** *с см.* **урча́ть**

**УРЧА́ТЬ** *несов.* **1.** (*о собаке*) ырылдау; (*о кошке*) мыраулау, мырылдау **2.** *безл.* (*в желудке*) көтөрләү, сорлау

**УРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **урва́ть**

**УРЫВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **урыва́ть**

**УРЫ́ВКАМИ** *нареч.*; *разг.* ара-тирә, ваҡыт-ваҡыт, урыҡ-һурыҡ; **ви́деться уры́вками** ара-тирә осрашып тороу; **учи́ться уры́вками** урыҡ-һурыҡ уҡып йөрөү

**УРЮ́К** *м собир.* өрөк (*киптерелгән абрикос емеше*)

**УРЯ́ДНИК** *м* урядник (**1.** *батша армияһында казачий ғәскәрҙең унтер-офицеры* **2.** *революцияға тиклем Рәсәйҙә өйәҙ полицияһында хеҙмәт иткән түбәнге чин*)

**УСА́ДЕБНЫЙ,** -ая, -ое усадьба ...ы; **уса́дебная земля́** усадьба ере

**УСАДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ултыртыу; **усади́ть дете́й** балаларҙы ултыртыу **2.** *кого-что, за что* и *с неопр.* -рға/-ргә ултыртыу; **усади́ть гото́вить уро́ки** дәрес әҙерләргә ултыртыу; **усади́ть пить чай** сәй эсергә ултыртыу **3.** *что, чем* ултыртып бөтөрөү (сығыу); **усади́ть у́лицу дере́вьями** урамға ағастар ултыртып сығыу

**УСА́ДКА** *ж*; *спец.* ултырыу, кәмеү; (*по ширине*) тарайыу; (*по длине*) ҡыҫҡарыу; **уса́дка костю́ма по́сле химчи́стки** костюмдың химик таҙартыуҙан һуң тарайыуы; **уса́дка шку́рок** тиреләрҙең ултырыуы

**УСА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* ултырыуҙан хасил булған, кәмеүҙән (ултырыуҙан) барлыҡҡа килгән; **уса́дочные пусто́ты в чугуне́** суйындағы кәмеүҙән барлыҡҡа килгән ҡыуышлыҡтар

**УСА́ДЬБА** *ж* **1.** (*отдельное хозяйство*) усадьба, йорт, йорт-ҡаралты, йорт-ҡура, утар; **больша́я уса́дьба** ҙур йорт **2.** (*хозяйственный и жилой центр*) усадьба; **центра́льная уса́дьба совхо́за** совхоздың үҙәк усадьбаһы **3.** (*земельный участок отдельного хозяйства*) баҡса, баҡса ере; **уса́дьба о́коло до́ма** өй эргәһендәге баҡса

**УСА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **усади́ть**

**УСА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **усе́сться 2.** *страд. от* **уса́живать**

**УСА́ТЫЙ,** -ая, -ое мыйыҡлы; **уса́тый стари́к** мыйыҡлы ҡарт; **уса́тый кит** мыйыҡлы кит

**УСА́Ч** *м*; *разг.* **1.** (*человек с усами*) мыйыҡбай, оҙон (ҡуйы) мыйыҡлы (кеше) **2.** (*рыба*) усач, мыйыҡлы балыҡ

**УСВА́ИВАНИЕ** *с см.* **усва́ивать**

**УСВА́ИВАТЬ** *несов. см.* **усво́ить**

**УСВА́ИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **усва́ивать**

**УСВОЕ́НИЕ** *с см.* **усво́ить**

**УСВО́ИТЬ** *сов. что* **1.** үҙләштереү, үҙләштереп алыу, эйә булыу; **усво́ить уро́к** дәресте үҙләштереү; **усво́ить но́вую мето́дику рабо́ты** яңы эш ысулына эйә булыу **2.** (*об организме*) үҙләштереү, һеңдереү; **усво́ить пи́щу** аш һеңдереү

**УСВОЯ́ЕМОСТЬ** *ж* (*способность сознания*) үҙләштереүсәнлек, үҙләштереү ҡеүәһе (мөмкинлеге); (*способность организма*) һеңдереүсәнлек, һеңдереү ҡеүәһе (көсө); **хоро́шая усвоя́емость програ́ммы** программаның яҡшы үҙләштереүсәнлеге; **усвоя́емость пи́щи** аш һеңдереүсәнлек

**УСЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **усе́ять**

**УСЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **усе́яться 2.** *страд. от* **усе́ивать**

**УСЕКА́ТЬ** *несов. см.* **усе́чь**

**УСЕКА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **усека́ть**

**УСЕ́РДИЕ** *с* тырышлыҡ, дәрт; **рабо́тать с усе́рдием** дәрт менән эшләү

**УСЕ́РДНОСТЬ** *ж* тырышлыҡ, ихласлыҡ; **изли́шняя усе́рдность** артыҡ тырышлыҡ

**УСЕ́РДНЫЙ,** -ая, -ое тырыш, ихлас; **усе́рдный труд** ихлас хеҙмәт; **усе́рдный рабо́тник** тырыш хеҙмәткәр

**УСЕ́РДСТВОВАТЬ** *несов.* тырышлыҡ (дәрт) менән эшләү, тырышып эшләү

**УСЕ́СТЬСЯ** *сов.* **1.** ултырыу, ултырышыу, иркенләп ултырыу; **усе́сться по свои́м места́м** үҙ урындарына ултырышыу **2.** *за что* и *с неопр.* (*начать заниматься чем-л.*) -ға/-гә, -рға/-ргә ултырыу, -ай/-әй башлау; **усе́сться за рабо́ту** эшкә ултырыу; **усе́сться чита́ть** уҡырға ултырыу

**УСЕЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **усе́чь** **2.** *прил.*; *мат.* киҫек, киҫелгән; **усечённый ко́нус** киҫелгән конус **3.** *прил.*; *грам.*, *лит.* ҡыҫҡартылған, киҫелгән; **усечённые прича́стия** ҡыҫҡартылған сифат ҡылымдар; **усечённый стих** ҡыҫҡартылған шиғыр

**УСЕ́ЧЬ** *сов. что* (осон) ҡырҡыу, ҡыҫҡартыу; **усе́чь ко́нус** конустың осон ҡырҡыу; **усе́чь оконча́ние** ялғауҙы ҡыҫҡартыу

**УСЕ́ЯТЬ** *сов. что* **1.** (*сплошь засеять*) тотош сәсеү; **усе́ять уча́сток пшени́цей** участкаға тотош бойҙай сәсеү **2.** (*покрыть*) ҡаплап алыу, тултырыу, һибелеү; **звёзды усе́яли не́бо** йондоҙҙар күк йөҙөнә һибелгән

**УСЕ́ЯТЬСЯ** *сов.* ҡапланыу, ҡаплап алыныу; **луга́ усе́ялись цвета́ми** болондар сәскә менән ҡапланды

**УСИДЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*удержаться, остаться сидеть*) (йығылмай) саҡ ултырып ҡалыу; **от толчка́ едва́ усиде́ть на ме́сте** һелкенеүҙән йығылмай саҡ ултырып ҡалыу **2.** (*остаться сидеть вопреки желанию*) сыҙап (түҙеп) ултырыу, ултыра алыу **3.** *обычно с отрицанием*; *разг.* (*удержаться на должности*) урынында ҡалыу (ултыра алыу); **не усиде́ть на рабо́те** эш урынында ултыра алмау

**УСИ́ДЧИВОСТЬ** *ж* ултырышлыҡ, түҙемлелек; **облада́ть уси́дчивостью** ултырышлығы булыу

**УСИ́ДЧИВЫЙ,** -ая, -ое ултырышлы, түҙемле, баҫылып эшләүсән; **уси́дчивый рабо́тник** ултырышлы хеҙмәткәр; **тре́бовать уси́дчивой рабо́ты** түҙемле эш талап итеү

**У́СИКИ** *мн.* (*ед.* **у́сик** *м*) **1.** *уменьш. от* **усы́** **2.** *бот.* мыйыҡ, мыйыҡса **3.** *зоол.* мыйыҡ (*бөжәктәрҙә*)

**УСИЛЕ́НИЕ** *с см.* **уси́лить** — **уси́литься**; **усиле́ние контро́ля** контролде көсәйтеү

**УСИ́ЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уси́лить** **2.** *прил.* ныҡ көс талап иткән, көсөргәнешле, көсәйтелгән, бик көслө; **уси́ленная охра́на** көсәйтелгән ҡарауыл **3.** *прил.* (*настойчивый*) ныҡ көс талап иткән, ныҡышмалы; **уси́ленная рабо́та** ныҡ көс талап иткән эш; **уси́ленная про́сьба** ныҡышмалы үтенес

**УСИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **уси́лить**

**УСИ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уси́литься** **2.** *страд. от* **уси́ливать**

**УСИ́ЛИЕ** *с* көсөргәнеш, тырышлыҡ, көс һалыу (түгеү); **уси́лие во́ли** ихтыяр көсө; **де́лать уси́лие** көсөргәнеш тыуҙырыу

**УСИЛИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** (*прибор*) көсәйткес, арттырғыс; **усили́тель постоя́нного то́ка** даими ток көсәйткесе; **магни́тный усили́тель** магнит көсәйткесе **2.** (*вещество для укрепления*) нығытҡыс, беркеткес, көсәйткес; **усили́тель рези́ны при вулканиза́ции** йылытып эшкәрткәндә резинаны нығытҡыс

**УСИЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое көсәйтеү ...ы, көсәйткес, көсәйтә торған; **усили́тельная подста́нция** көсәйтеү подстанцияһы; **усили́тельная ла́мпа** көсәйткес лампа

**УСИ́ЛИТЬ** *сов. что* көсәйтеү, ҡеүәтләндереү, шәбәйтеү, көсөн (ҡеүәтен) арттырыу; **уси́лить звук** тауышты көсәйтеү

**УСИ́ЛИТЬСЯ** *сов.* көсәйеү, ҡеүәтләнеү, ҡеүәте (көсө) артыу, шәбәйеү; **волне́ние на мо́ре уси́лилось** диңгеҙ(ҙең) тулҡынланыуы көсәйҙе

**УСКАКА́ТЬ** *сов.* **1.** һикерәнләп китеү, һикерә-һикерә китеп барыу **2.** (*умчаться вскачь*) сабып (саптырып) китеү; **ко́ни ускака́ли** аттар сабып китте; **ускака́ть на коне́** атта саптырып китеү **3.** *разг.* (*быстро удалиться*) бик тиҙ (шәп) китеп барыу (китеү); **ускака́ть с друзья́ми на ре́ку** дуҫтар менән йылғаға бик тиҙ китеп барыу ♦ **далеко́ не ска́чешь (не уйдёшь)** *см.* **далеко́**

**УСКОЛЬЗА́ТЬ** *несов. см.* **ускользну́ть**

**УСКОЛЬЗНУ́ТЬ** *сов.* **1.** (*вырваться*) шыуып төшөп китеү, шыуып китеү, ҡулдан ысҡыныу; **нали́м ускользну́л из рук** шамбы ҡулдан ысҡынып китте **2.** *разг.* (*уйти незамеченным*) сығып тайыу, шылыу, һыҙыу, ысҡыныу; **незаме́тно ускользну́ть с собра́ния** йыйылыштан һиҙҙермәйсә шылыу **3.** *от кого-чего*; *разг.* күренмәй ҡалыу, һиҙелмәй ҡалыу, ситтә ҡалыу, төшөп ҡалыу; **э́то ускользну́ло от моего́ внима́ния** был минең иғтибарҙан ситтә ҡалған **4.** *от чего*; *разг.* (*уклониться*) тайпылыу, янтайыу; **ускользну́ть от прямо́го отве́та** тура яуаптан тайпылыу ♦ **ускользну́ть из рук (из-под па́льцев)** (эләктереү) бәхетенән яҙыу, буй етмәй ҡалыу

**УСКОРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **уско́рить** — **ускоря́ть, уско́риться** — **ускоря́ться** **2.** *физ.* тиҙләнеш

**УСКО́РЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уско́рить** **2.** *прил.* (*более быстрый, чем обычно*) тиҙ, етеҙ, тиҙлекле, тиҙләтелгән; **уско́ренное движе́ние** етеҙ хәрәкәт; **уско́ренный темп** тиҙләтелгән темп; **уско́ренный курс обуче́ния** тиҙләтелгән уҡыу курсы

**УСКОРИ́ТЕЛЬ** *м*; *тех.* тиҙләткес; **ускори́тель заря́женных части́ц** зарядлы киҫәксәләрҙең тиҙләткесе

**УСКОРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* тиҙләткес, тиҙләтеү ...ы; **ускори́тельный прибо́р** тиҙләткес прибор

**УСКО́РИТЬ** *сов. что* **1.** тиҙләтеү, ҡыҙыулатыу, шәбәйтеү, йәһәтләү; **уско́рить шаги́** аҙымды шәбәйтеү **2.** (*приблизить по времени*) ҡабаландырыу, тиҙләтеү, йәһәтләү; **уско́рить отъе́зд** китеүҙе йәһәтләү

**УСКО́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать более быстрым*) шәбәйеү, ҡыҙыу, тиҙләнә (ҡыҙыулана) төшөү, шәбәйә барыу, шәбәйеп китеү **2.** (*наступить скорее, чем ожидалось*) тиҙләтелеү, ашыҡтырылыу, алданыраҡ булыу; **отъе́зд уско́рился из-за непого́ды** көн боҙолоу арҡаһында китеү тиҙләтелде

**УСКОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **уско́рить**

**УСКОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уско́риться** **2.** *страд. от* **ускоря́ть**

**УСЛА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов. см.* **усло́вливаться**

**УСЛА́ДА** *ж*; *уст., трад.-поэт.* ләззәт, рәхәт(лек), хозур(лыҡ)

**УСЛАДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* ләззәтләндергес, зауыҡландырғыс, хозурландырғыс; **услади́тельное пе́ние соловья́** һандуғастың ләззәтләндергес һайрауы

**УСЛАДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *уст.* ләззәтләндереү, хозурланыу, зауыҡландырыу; **услади́ть слух пе́нием** тыңлаусыны йыр менән ләззәтләндереү

**УСЛАДИ́ТЬСЯ** *сов. чем*; *уст.* ләззәтләнеү, зауыҡланыу, хозурланыу

**УСЛАЖДА́ТЬ** *несов. см.* **услади́ть**

**УСЛАЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **услади́ться** **2.** *страд. от* **услажда́ть**

**УСЛАЖДЕ́НИЕ** *с см.* **услади́ть — услажда́ть**, **услади́ться — услажда́ться**; **услажде́ние поэ́зией** шиғриәт менән ләззәтләнеү

**УСЛАСТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** шәкәрләү, татлау, татлы (шәкәрле) итеү **2.** *перен.* (*польстить*) ялағайланыу, юхалау

**УСЛАСТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *уст.* ныҡ шәкәрле (татлы) булыу

**УСЛА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ебәреү, һөрөү; **усла́ть в глушь** төпкөлгә ебәреү

**УСЛАЩА́ТЬ** *несов. см.* **усласти́ть**

**УСЛАЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **усласти́ться** **2.** *страд. от* **услаща́ть**

**УСЛЕДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *за кем-чем* ҡарап тороу, күҙ-колаҡ булыу, күҙәтеп (һаҡлап) ҡалыу (тороу); **уследи́ть за детьми́** балаларҙы ҡарап тороу **2.** *за чем* (*не упустить из виду*) күҙәтеп (тикшереп, ҡарап) барыу; **уследи́ть за газе́тными новостя́ми** гәзит яңылыҡтарын күҙәтеп барыу; **уследи́ть за разви́тием собы́тий** ваҡиғаларҙың үҫешен күҙәтеп барыу

**УСЛО́ВИЕ** *с* **1.** *мн.* **усло́вия** (*обстоятельства*) шарттар; **усло́вия жи́зни** тормош шарттары; **созда́ть усло́вия для рабо́ты** эш өсөн шарттар булдырыу; **жили́щные усло́вия** торлаҡ шарттары **2.** *обычно мн.* **усло́вия** (*требования*) талаптар, ҡағиҙәләр, шарттар; **усло́вия по́льзования электри́чеством** электр менән файҙаланыу ҡағиҙәләре; **каковы́ ва́ши усло́вия?** һеҙҙең талаптарығыҙ ниндәй? **3.** (*уговор*) килешеү, һүҙ ҡуйышыу; **нару́шить усло́вие** килешеүҙе боҙоу **4.** *обычно мн.* **усло́вия** шарт, бирелеш; **усло́вия зада́чи** мәсьәләнең шарты

**УСЛО́ВИТЬСЯ** *сов. с кем, о чём* и *с неопр.* килешеү, һүҙ ҡуйышыу, вәғәҙәләшеү; **усло́виться о встре́че** осрашыу тураһында һүҙ ҡуйышыу

**УСЛО́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое килешелгән, (алдан) һөйләшелгән, һүҙ ҡуйышҡан, вәғәҙәләшкән, билдәләнгән; **усло́вленное вре́мя** килешелгән ваҡыт; **усло́вленная встре́ча** алдан һөйләшелгән осрашыу

**УСЛО́ВЛИВАТЬСЯ** и **УСЛА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов. см.* **усло́виться**

**УСЛО́ВНОСТЬ** *ж* **1.** шартлылыҡ; **усло́вность а́дреса** адрестың шартлылығы; **усло́вность декора́ции** биҙәлештең шартлылығы **2.** шартлылыҡ, шартлы ҡағиҙәләр, шартлы ғөрөф-ғәҙәттәр; **быть проти́вником усло́вностей** шартлы ҡағиҙәләргә ҡаршы булыу

**УСЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* шартлы; **усло́вный сигна́л** шартлы сигнал; **усло́вный знак** шартлы билдә; **усло́вный пригово́р** шартлы хөкөм; **усло́вное согла́сие** шартлы ризалыҡ; **усло́вные зна́ки** шартлы билдәләр **2.** *грам.* шарт; **усло́вное наклоне́ние** шарт һөйкәлеше ♦ **усло́вные рефле́ксы** шартлы рефлекстар

**УСЛОЖНЕ́НИЕ** *с см.* **усложни́ть — усложня́ть**, **усложни́ться — усложня́ться**

**УСЛОЖНЁННОСТЬ** *ж* ҡатмарлылыҡ, хәлдең ҡатмарлы (ауыр) булыуы

**УСЛОЖНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **усложни́ть** **2.** *прил.* ҡатмарлы; **усложнённая те́хника** ҡатмарлы техника

**УСЛОЖНИ́ТЬ** *сов. что* ҡатмарландырыу, ҡатмарлаштырыу, ҡыйынлаштырыу, ауырлаштырыу; **усложни́ть прое́кт** проектты ҡатмарландырыу; **усложни́ть рабо́ту** эште ҡатмарлаштырыу

**УСЛОЖНИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡатмарланыу, ҡатмарлашыу, ауырлашыу, ҡыйынлашыу; **план рабо́ты усложни́лся** эш планы ҡатмарланды; **жизнь усложни́лась** тормош ауырлашты

**УСЛОЖНЯ́ТЬ** *несов. см.* **усложни́ть**

**УСЛОЖНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **усложни́ться** **2.** *страд. от* **усложня́ть**

**УСЛУ́ГА** *ж* **1.** булышлыҡ, ярҙам, хеҙмәт; **дру́жеская услу́га** дуҫтарса ярҙам **2.** *мн.* **услу́ги** уңайлыҡтар, хеҙмәт; **коммуна́льные услу́ги** коммуналь хеҙмәт; **услу́ги свя́зи** бәйләнеш уңайлыҡтары ♦ **медве́жья услу́га** ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарыу; **к ва́шим услу́гам** һеҙгә ярҙам итергә әҙер (*әҙәплелек билдәһе*)

**УСЛУЖЕ́НИЕ** *с*; *уст.* **1.** ялсы (хеҙмәтсе) булыу, хеҙмәт; **быть в услуже́нии** ялсы булып тороу **2.** *разг.* (*угождение*) ярамһаҡланыу, ялағайланыу

**УСЛУЖИ́ТЬ** *сов. кому* **1.** ярҙам итеү (күрһәтеү), булышлыҡ итеү (күрһәтеү), ярҙамлашыу, булышыу; **всегда́ рад услужи́ть** ярҙам итергә һәр саҡ әҙер **2.** (*угодить*) ярау; **услужи́ть нача́льнику** түрәгә ярау

**УСЛУ́ЖЛИВОСТЬ** *ж* **1.** ярҙамсыллыҡ, ярҙам (хеҙмәт) күрһәтергә әҙер тороу (булыу) **2.** ялағайлыҡ

**УСЛУ́ЖЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ярҙамсыл, булышыусан **2.** ярамһаҡ, ялағай; **услу́жливый сотру́дник** ярамһаҡ хеҙмәткәр

**УСЛЫХА́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **услы́шать**

**УСЛЫ́ШАТЬ** *сов.* **1.** *что* и *с союзом* "*что*" (*воспринять слухом*) ишетеү; **услы́шать пе́ние соловья́** һандуғас һайрауын ишетеү **2.** *что*, *про кого-что*, *о ком-чём* (*узнать*) ишетеү, белеү, ишетә белеү; **услы́шать до́брую весть** яҡшы хәбәр ишетеү **3.** *что* (*ощутить запах чего-л.*) һиҙеү, тойоу; **услы́шать за́пах я́блок** алма еҫен һиҙеү

**УСМА́ТРИВАТЬ** *несов. см.* **усмотре́ть**

**УСМА́ТРИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **усма́тривать**

**УСМЕХА́ТЬСЯ** *несов. см.* **усмехну́ться**

**УСМЕХНУ́ТЬСЯ** *сов.* көләмһерәү, йылмайыу, көләмһерәп (йылмайып) ҡуйыу

**УСМЕ́ШКА** *ж* көләмһерәү, йылмайыу, көләмһерәп (йылмайып) ҡуйыу; **лука́вая усме́шка** хәйләкәр йылмайыу

**УСМЕ́ШЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о человеке*) көләмһерәргә яратҡан **2.** (*выражающий усмешку*) көләмһерәгән, мут, хәйләкәр; **усме́шливый взгляд** мут ҡараш

**УСМИРЕ́НИЕ** *с см.* **усмири́ть — усмиря́ть, усмири́ться — усмиря́ться**

**УСМИРИ́ТЕЛЬ** *м* тынысландырыусы, тыныс хәлгә килтереүсе

**УСМИРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое баҫтырыу ...ы, баҫтырыуға (тынысландырыуға) ҡоролған; **усмири́тельные ме́ры** баҫтырыу саралары

**УСМИРИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** буйһондороу, йыуашайтыу, ҡулға өйрәтеү, баҫынҡыландырыу; (*о лошади*) еккегә (менгегә) өйрәтеү; **усмири́ть необъе́зженного коня́** аҫау атты менгегә өйрәтеү **2.** баҫтырыу, туҡтатыу; **усмири́ть мяте́ж** фетнәне баҫтырыу

**УСМИРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** баҫынҡыланыу, йыуашайыу, баҫылыу; **ло́шадь усмири́лась** ат йыуашайҙы **2.** баҫылыу, туҡталыу; **восста́вшие усмири́лись** баш күтәреүселәр баҫылды

**УСМИРЯ́ТЬ** *несов. см.* **усмири́ть**

**УСМИРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **усмири́ться 2.** *страд. от* **усмиря́ть**

**УСМОТРЕ́НИЕ** *с* ҡарау, ҡарамаҡ, хөкөм, ихтыяр; **де́йствовать по своему́ усмотре́нию** үҙ ҡарамағың буйынса эш итеү

**УСМОТРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *за кем-чем*; *разг.* күҙәтеү, күҙ-ҡолаҡ булыу, күҙҙән ысҡындырмау; **за все́ми сра́зу не усмо́тришь** барыһын да бер юлы күҙәтеп бөтөрә алмаҫһың **2.** *что*, *в чём* (*установить*, *признать*) күреү, һиҙеү, күреп (һиҙеп) алыу, тип табыу (һанау, ҡарау); **усмотре́ть в докуме́нте оши́бку** документта хата күреү

**УСНАСТИ́ТЬ** *сов. что*, *чем* **1.** (*снабдить в большом количестве*) тәьмин итеү, йыһазландырыу **2.** (*украсить словами*) биҙәү, сыбарлау; **уснасти́ть речь цита́тами** телмәрҙе цитаталар менән сыбарлау

**УСНАЩА́ТЬ** *несов. см.* **уснасти́ть**

**УСНАЩА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **уснаща́ть**

**УСНУ́ТЬ** *сов.* **1.** йоҡлау, йоҡлап китеү, йоҡоға китеү (талыу); **ребёнок усну́л** бала йоҡланы **2.** (*о рыбе*) үлеү ♦ **усну́ть наве́ки**; **усну́ть ве́чным (моги́льным) сном** мәңгелек йоҡоға талыу, үлеү

**УСО́БИЦА** *ж*; *уст. см.* **междоусо́бие**

**УСОВЕРШЕ́НСТВОВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **усоверше́нствовать**, **усоверше́нствоваться**; **усоверше́нствование зна́ний** белемде камиллаштырыу **2.** *обычно мн.* **усоверше́нствования** (*изменения в чём-л.*) камиллыҡ, яҡшыртыу; **ввести́ усоверше́нствование в мето́дику обуче́ния** уҡытыу методикаһына камиллыҡ индереү

**УСОВЕРШЕ́НСТВОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **усоверше́нствовать 2.** *прил.* камиллашҡан, камиллаштырылған; **усоверше́нствованная мето́дика обуче́ния** камиллаштырылған уҡытыу методикаһы

**УСОВЕРШЕ́НСТВОВАТЬ** *сов.*, *несов. см.* **соверше́нствовать**; **усоверше́нствовать зна́ния** белемде камиллаштырыу

**УСОВЕРШЕ́НСТВОВАТЬСЯ** *сов.*, *несов. см.* **соверше́нствоваться**

**УСО́ВЕСТИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* оялтыу, инсафлыҡҡа килтереү

**УСОМНИ́ТЬСЯ** *сов. в ком-чём* шикләнеү, шиккә төшөү, шик тыуыу, шөбһәләнеү; **усомни́ться в и́скренности его́ слов** һүҙҙәренең ихласлығына шикләнеү

**УСО́ПШИЙ,** -ая, -ее **1.** *уст.* мәрхүм, үлгән, вафат булған **2.** *в знач. сущ.* **усо́пший** *м* и **усо́пшая** *ж* мәрхүм

**УСО́ХНУТЬ** *сов.* **1.** (*уменьшиться в весе при высыхании*) кибеү, кәмеү, кесерәйеү **2.** *перен.*, *разг.* (*похудеть*) ябығыу, кибеү, ҡартайып сүгеү

**УСПЕВА́ЕМОСТЬ** *ж* өлгәшеү, өлгәш; **та́бель успева́емости** өлгәшеү табеле

**УСПЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **успе́ть 2.** (*успешно учиться*) өлгәшеү; **успева́ть по всем предме́там** бөтә предметтарҙан да өлгәшеү

**УСПЕВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **успева́ть 2.** *прил.* өлгәшеүсе, өлгөрөүсе; **успева́ющий учени́к** өлгәшеүсе уҡыусы

**УСПЕ́ЕТСЯ** *сов. безл.*; *разг.* өлгөрөләр, өлгөрөләр әле, ҡабаланырға түгел

**УСПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*сделать в срок*) өлгөрөү, етешеү; **успе́ть за́светло** яҡтыла өлгөрөү **2.** (*прибыть в срок*) килеп (барып) етеү, өлгөрөү; **успе́ть**

**на по́езд** поезға өлгөрөү; **успе́ть на заседа́ние** ултырышҡа килеп етеү **3.** *в чём*; *уст.* (*достичь успеха*) уңышҡа ирешеү, уңыш ҡаҙаныу; **успе́ть в нау́ках** фән өлкәһендә уңышҡа ирешеү ♦ **не успе́ешь огляну́ться, как** *см.* **огляну́ться**; **не успе́ть (и) гла́зом мигну́ть (моргну́ть)** күҙ асып йомғансы

**УСПЕ́Х** *м* **1.** уңыш, уңышлыҡ **2.** (*общественное признание*) уңыш, ҡаҙаныш, уңыш ҡаҙаныу; **кни́га име́ла большо́й успе́х** китап ҙур уңыш ҡаҙанды ♦ **с успе́хом** уңышлы, уңышлы рәүештә; **с таки́м же (с тем же) успе́хом**: 1) шундай уҡ уңыш менән, шул уҡ уңыш менән; 2) шундай уҡ, шуның кеүек (шикелле) уңышһыҙ

**УСПЕ́ШНОСТЬ** *ж* уңышлылыҡ, уңышлы (уң) булыу (барыу); **успе́шность де́ла** эштең уңышлы булыуы

**УСПЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое уңышлы, уң; **успе́шное нача́ло** уңышлы башланғыс

**УСПОКА́ИВАТЬ** *несов. см.* **успоко́ить**

**УСПОКА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **успоко́иться 2.** *страд. от* **успока́ивать**

**УСПОКОЕ́НИЕ** *с см.* **успоко́ить — успоко́иться**; **для успокое́ния ма́тери** әсәне тынысландырыу өсөн

**УСПОКО́ЕННОСТЬ** *ж* **1.** (*умиротворённость*) тыныслыҡ **2.** (*состояние покоя*) тынлыҡ

**УСПОКОИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** тынысландырыусы **2.** *спец.* тирбәлеүҙе баҫыусы (туҡтатыусы) ҡулайлама

**УСПОКОИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* тынысландырыусы

**УСПОКОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тынысландырғыс, тынысландыра торған; **успокои́тельные ка́пли** тынысландыра торған шыйыҡ дарыу **2.** *в знач. сущ.* **успокои́тельное** *с* тынысландырғыс дарыу

**УСПОКО́ИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тынысландырыу, йыуатыу, тымыҙыу; **успоко́ить дете́й** балаларҙы тынысландырыу **2.** *что* баҫыу, кәметеү, баҫылдырыу; **успоко́ить боль** ауыртыуҙы баҫыу

**УСПОКО́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** тынысланыу, тыныу, тымыу; **мо́ре успоко́илось** диңгеҙ тынды **2.** баҫылыу, кәмеү; **боль успоко́илась** һыҙлау баҫылды **3.** *разг.* ҡәнәғәтләнеү, тынысланыу; **успоко́иться на дости́гнутом** өлгәшкән менән ҡәнәғәтләнеү

**УСТА́** *только мн.*; *трад.-поэт.*, *уст.* ауыҙ, ирен ♦ **из пе́рвых уст (узна́ть, услы́шать)** үҙ ауыҙынан (ишетеү); **из уст в уста́** телдән телгә; **на уста́х у всех** *что* барыһының да телендә (ауыҙында) шул, барыһы ла шуны һөйләй; **ва́шими бы уста́ми (да) мёд пить** ауыҙығыҙға бал да май

**УСТА́В** *м* устав; **во́инский уста́в** хәрби устав; **де́йствовать по уста́ву** устав буйынса эш итеү

**УСТАВА́ТЬ** *несов. см.* **уста́ть** ♦ **не устава́я (де́лать)** *что* арымай-талмай (эшләү)

**УСТА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*разместить*) теҙеп ҡуйыу, урынлаштырыу; **уста́вить кни́ги в шкаф** китаптарҙы шкафҡа теҙеп ҡуйыу **2.** *что, чем* (*занять всю площадь*) теҙеү, ҡуйыу, тултырыу; **уста́вить по́лки кни́гами** кәштәләрҙе китап менән тултырыу **3.** *разг.* текәлеү, текәлеп ҡарау, текәү, төбәү; **уста́вить взгляд** күҙҙе текәү

**УСТА́ВИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*уместиться*) урынлашыу, һыйыу, тулыу, урынлашып бөтөү, һыйып бөтөү; **кни́ги уста́вились в шкафу́** китаптар шкафҡа һыйып бөттө **2.** *чем*; *разг.* тулыу, тулып бөтөү; **луг уста́вился стога́ми** болон кәбәндәр менән тулды **3.** *на кого-что, в кого-что*; *разг.* текләү, текәлеү, тексәйеү, төбәлеү, текләп ҡарау; **уста́виться в окно́** тәҙрәгә төбәлеү

**УСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **уста́вить**

**УСТАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уста́виться 2.** *страд. от* **уставля́ть**

**УСТА́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** устав …ы; **уста́вное положе́ние** устав положениеһы **2.** (*совершаемый по уставу*) уставҡа ярашлы, устав буйынса

**УСТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **устоя́ть**

**УСТА́ИВАТЬСЯ** *несов. см.* **устоя́ться**

**УСТА́ЛОСТЬ** *ж* **1.** арығанлыҡ, талсығыу, хәлһеҙлек, арыу, хәл бөтөү, хәлһеҙләнеү; **почу́вствовать уста́лость** арығанлыҡ тойоу **2.** *тех.* талыу, талығыу, талсығыу; **уста́лость мета́ллов** металдың талығыуы (*көсөргәнештең үҙгәреп тороуы арҡаһында металдың ныҡлығы кәмеү*)

**УСТА́ЛЫЙ,** -ая, -ое арыған, талсыҡҡан, хәле бөткән; **уста́лый спу́тник** арыған юлсы; **уста́лые глаза́** талсыҡҡан күҙҙәр

**У́СТАЛЬ: без у́стали** арымай-талмай, арыу-талыуһыҙ; **не знать у́стали** арыу-талыуҙы белмәй

**УСТАНА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **установи́ть**

**УСТАНА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **установи́ться 2.** *страд. от* **устана́вливать**

**УСТАНОВИ́ТЬ** *сов. что* **1.** урынлаштырыу, урынлаштырып ҡуйыу; **установи́ть теле́гу на паро́ме** арбаны паромға урынлаштырыу **2.** ҡуйыу; **установи́ть па́мятник** һәйкәл ҡуйыу; **установи́ть столбы́** бағаналар ҡуйыу; **установи́ть телефо́н** телефон ҡуйыу **3.** билдәләү, раҫлау, ғәмәлгә индереү; **установи́ть дни заня́тий** дәрес көндәрен билдәләү **4.** (*осуществить, организовать*) урынлаштырыу, булдырыу, ойоштороу; **установи́ть связь** элемтә урынлаштырыу; **установи́ть мир** тыныслыҡ урынлаштырыу **5.** (*выяснить, доказать*) аныҡлау, билдәләү, асыҡлау, иҫбатлау; **установи́ть и́стину** хәҡиҡәтте асыҡлау

**УСТАНОВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать устойчивым, постоянным*) урынлаштырыу, яйға һалыныу, рәтләнеү; **пого́да установи́лась** көндәр рәтләнде **2.** (*сформироваться*) нығыныу, нығыу, формалашыу; **установи́лась тради́ция** традиция нығынды; **го́лос не установи́лся** тауыш нығынмаған **3.** (*настать*) урынлашыу, булдырылыу, юлға (яйға) һалыныу; **установи́лся мир** тыныслыҡ урынлашты; **установи́лся поря́док** тәртип булдырылды; **установи́лась тишина́** тыныслыҡ урынлашты

**УСТАНО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **установи́ть — устана́вливать** 1, 2; **2.** (*механизм, приспособление*) ҡулайлама; **заводски́е устано́вки** завод ҡулайламалары **3.** (*целевая направленность*) маҡсат итеп ҡуйыу, йүнәлеш, ҡуйылыш; **устано́вка на ка́чество проду́кции** продукцияның сифатын маҡсат итеп ҡуйыу **4.** (*указание, директива*) күрһәтмә; **устано́вка центра́льных о́рганов** үҙәк органдарҙың күрһәтмәһе

**УСТАНОВЛЕ́НИЕ** *с см.* **установи́ть** 2—5

**УСТАНО́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **установи́ть 2.** *прил.* уставта (законда) ҡаралған, устав (закон) менән билдәләнгән; **в устано́вленном поря́дке** уставта ҡаралған тәртип буйынса

**УСТАНО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** урынлаштырыу ...ы, көйләү ...ы; **устано́вочный винт** көйләү винты **2.** (*соответствующий какой-л. установке*) йүнәлеш биреүсе (бирә торған), юл күрһәткес; **устано́вочные вопро́сы** йүнәлеш биреүсе мәсьәләләр

**УСТАНО́ВЩИК** *м* ҡороусы, көйләүсе, көйләп ҡуйыусы; **устано́вщик маши́н** машиналарҙы көйләп ҡуйыусы

**УСТАРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **устаре́ть**

**УСТАРЕ́ЛОСТЬ** *ж* иҫкергәнлек, иҫкергән булыу; **устаре́лость моде́ли** моделдең иҫкергәнлеге

**УСТАРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* (*ставший старым, дряхлым*) ҡарт, ҡартайған **2.** иҫкергән, иҫке; **устаре́лый взгляд** иҫкергән ҡараш; **устаре́лый фасо́н** иҫке фасон

**УСТАРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *уст.* (*постареть*) ҡартайыу **2.** (*выйти из употребления*) иҫкереү, ғәмәлдән сығыу, ҡулланылмау; **э́тот уче́бник устаре́л** был дәреслек иҫкергән

**УСТА́ТЬ** *сов.* арыу, арып бөтөү (китеү), талыу, талсығыу; **уста́ть от до́лгой ходьбы́** оҙаҡ йөрөүҙән арыу; **уста́ть ждать** көтөп арыу

**УСТЕЛИ́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **устла́ть**

**УСТЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **устла́ться**

**УСТЕРЕ́ЧЬ** *сов. кого-что* **1.** һаҡлау, һаҡлап алып ҡалыу; **устере́чь де́ньги** аҡсаны һаҡлау **2.** (*подстеречь*) ҡарауыллау

**УСТЕРЕ́ЧЬСЯ** *сов.*; *разг.* һаҡланыу, һаҡланып ҡалыу; **устере́чься от просту́ды** һалҡын тейеүҙән һаҡланыу

**УСТИЛА́ТЬ** *несов. см.* **устла́ть**

**УСТИЛА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **устла́ться 2.** *страд. от* **устила́ть**

**УСТЛА́ТЬ** *сов. что, чем* **1.** түшәү, йәйеү, түшәп (йәйеп) сығыу (ҡуйыу), ҡаплау; **устла́ть пол ковро́м** иҙәнгә келәм йәйеп ҡуйыу **2.** (*покрыть собой всю поверхность*) түшәү, ҡаплау

**УСТЛА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** түшәлеү, ҡапланыу **2.** (*приготовить себе постель*) урын йәйеү (түшәү, һалыу)

**У́СТНЫЙ,** -ая, -ое телдән, күңелдән; (*о речи*) һөйләү ...ы, **у́стная речь** һөйләү телмәре; **у́стный отве́т** телдән яуап биреү; **у́стное вычисле́ние** күңелдән иҫәпләү

**УСТО́Й** *м* **1.** терәк, терәү; **береговы́е усто́и моста́** күперҙең ярҙағы терәүҙәре **2.** *мн.* **усто́и**; *перен.* нигеҙ; **мора́льные усто́и о́бщества** йәмғиәттең әхлаҡи нигеҙҙәре **3.** *разг.* (*сгустившийся слой на поверхности жидкости*) шекәрә, өҫтө

**УСТО́ЙЧИВОСТЬ** *ж*; *прям.*, *перен.* тотороҡлолоҡ; **усто́йчивость взаимоотноше́ний** үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙең тотороҡлолоғо

**УСТО́ЙЧИВЫЙ,** -ая, -ое *прям.*, *перен.* тотороҡло; **усто́йчивая ло́дка** тотороҡло кәмә; **усто́йчивая валю́та** тотороҡло валюта; **усто́йчивое мне́ние** тотороҡло ҡараш

**...УСТО́ЙЧИВЫЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "бирешмәүсән", "сыҙамлы", "түҙемле" мәғәнәләрен аңлатҡан икенсе өлөшө, мәҫ.*, **морозоусто́йчивый** һыуыҡҡа сыҙамлы, һыуыҡҡа бирешмәүсән

**УСТОЯ́ТЬ** *сов.* **1.** (*не упасть*) аумау, ҡоламау, ныҡ тороу; **устоя́ть на нога́х** аяҡта ныҡ тороу **2.** *перен.* (*выдержать напор чего-л.*) ныҡ тороу, бирешмәү, ҡаршы тора алыу; **устоя́ть в спо́ре** бәхәстә бирешмәү

**УСТОЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*успокоиться*) тоноу, тоноҡланыу **2.** (*дать устой*) өҫтө(нә) ултырыу, шекәрә ҡаплау **3.** (*стать готовым к использованию*) әсеү, әсеп әҙер булыу; **квас устоя́лся** кеүәҫ әсеп әҙер булды **4.** *перен.*, *разг.* (*стать постоянным*) нығыныу, яҡшырыу, тотороҡланыу, даими хәлдә булыу (хәлгә килеү); **пого́да устоя́лась** көн яҡшырҙы; **хара́ктер его́ не устоя́лся** уның холҡо нығынмаған әле

**УСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **устро́ить**

**УСТРА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **устро́иться 2.** *страд. от* **устра́ивать**

**УСТРАНЕ́НИЕ** *с см.* **устрани́ть — устраня́ть**; **устране́ние от до́лжности** вазифаһынан бушатыу

**УСТРАНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ситкә алып ташлау; **устрани́ть всё, что меша́ет рабо́те** эшкә ҡамасаулаған бөтә нәмәне ситкә алып ташлау **2.** *что* бөтөрөү, юҡ итеү; **устрани́ть ава́рию** аварияны бөтөрөү; **устрани́ть недоста́тки** етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү **3.** *кого-что* (*отстранить, уволить*) бушатыу, сығарыу, алыу, ҡыуыу, урынынан төшөрөү (алыу); **устрани́ть из институ́та** институттан ҡыуыу

**УСТРАНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *от чего* ситләшеү, ситләшеп китеү; **устрани́ться от дел** эштән ситләшеү **2.** бөтөрөлөү; **недоста́тки устрани́лись** етешһеҙлектәр бөтөрөлдө

**УСТРАНЯ́ТЬ** *несов. см.* **устрани́ть**

**УСТРАНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **устрани́ться 2.** *страд. от* **устраня́ть**

**УСТРАША́ТЬ** *несов. см.* **устраши́ть**

**УСТРАША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **устраши́ться 2.** *страд. от* **устраша́ть**

**УСТРАША́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **устраша́ть 2.** *прил.* ҡурҡыныс, ҡурҡытырлыҡ; **устраша́ющий вид** ҡурҡыныс ҡиәфәт

**УСТРАШЕ́НИЕ** *с см.* **устраши́ть** — **устраша́ть**, **устраши́ться** — **устраша́ться**; **на устраше́ние врага́м** дошманды ҡурҡытыу өсөн

**УСТРАШИ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡурҡытыу, ҡурҡыу һалыу, ҡурҡыуға төшөрөү; **устраши́ть проти́вника** дошманды ҡурҡыуға төшөрөү

**УСТРАШИ́ТЬСЯ** *сов. кого-что* ҡурҡыу, шөрләү, ҡурҡыуға төшөү; **не устраши́ться угро́з** янауҙарҙан ҡурҡмау

**УСТРЕМИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *книжн.* йүнәлдереү, йүнәлтеү; **устреми́ть ко́нницу на врага́** дошманға атлы ғәскәр йүнәлдереү **2.** *перен.* йүнәлтеү, йүнәлдереү, төбәү; **устреми́ть всё внима́ние** бөтә иғтибарҙы йүнәлдереү

**УСТРЕМИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ташланыу, атылыу, ынтылыу; **устреми́ться за команди́ром** командир артынан ташланыу **2.** *перен.* йүнәлеү, төбәлеү; **взо́ры устреми́лись на воше́дшего** ҡараштар ингән кешегә төбәлде

**УСТРЕМЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **устреми́ть** — **устремля́ть**, **устреми́ться** — **устремля́ться** **2.** (*намерение*) ынтылыш, теләк; **эгоисти́ческие устремле́ния** эгоистик ынтылыштар

**УСТРЕМЛЁННОСТЬ** *ж* ынтылышлыҡ, ынтылышлы булыу; **устремлённость к це́ли** маҡсатҡа ынтылышлыҡ

**УСТРЕМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **устреми́ть**

**УСТРЕМЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **устреми́ться** **2.** *страд. от* **устремля́ть**

**У́СТРИЦА** *ж* устрица (*диңгеҙ моллюскаһы*)

**У́СТРИЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** устрица ...ы; **у́стричная ра́ковина** устрица ҡабырсағы **2.** устрица; **у́стричный про́мысел** устрица аулау кәсебе

**УСТРО́ЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **устро́ить** **2.** *прил.* йайланған, (бер) тәртипкә һалынған (килтерелгән); **устро́енная жизнь** бер тәртипкә һалынған тормош

**УСТРОИ́ТЕЛЬ** *м* и **УСТРОИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* ойоштороусы; **устрои́тель конце́рта** концерт ойоштороусы

**УСТРО́ИТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡороу, рәтләү; **устро́ить в за́ле сце́ну** залда сәхнә ҡороу **2.** *что* (*организовать*) ойоштороу; **устро́ить вы́ставку** күргәҙмә ойоштороу **3.** *что* (*учинить*) ҡуптарыу, күтәреү; **устро́ить сканда́л** янъял ҡуптарыу **4.** *что* (*уладить*) йайға (рәткә) һалыу, рәтләү, көйләү, көйгә һалыу; **устро́ить свои́ дела́** эштәрҙе йайға һалыу **5.** *что, кому; разг.* (*посодействовать*) булышыу, йайға (көйгә, рәткә) һалышыу; **устро́ить биле́т в теа́тр** театрға билет алырға булышыу **6.** *кого-что* (*определить*) урынлаштырыу, индереү; **устро́ить на рабо́ту** эшкә урынлаштырыу **7.** *кого-что* (*быть удобным, подойти*) ярау, яраҡлы булыу, ҡулай булыу; **одноме́стная ко́мната его́ устро́ила** бер урынлы бүлмә уға ҡулай булды

**УСТРО́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*наладиться*) рәтләнеү, рәткә һалыныу, йайланыу, йайға һалыныу **2.** (*поступить*) урынлашыу, инеү; **устро́иться на заво́д** заводҡа эшкә инеү **3.** (*разместиться, расположиться*) урынлашыу, урын табыу (яйлау); **устро́иться на ночле́г** ҡунырға урын табыу

**УСТРО́ЙСТВО** *с* **1.** *см.* **устро́ить** — **устра́ивать** 1—6, **устро́иться** — **устра́иваться** 2; **2.** (*конструкция*) төҙөлөш, ҡоролош, яһалыш; **устро́йство радиоприёмника** радиоалғыстың төҙөлөшө **3.** (*строй*) ҡоролош; **обще́ственное устро́йство** йәмғиәт ҡоролошо **4.** (*механизм*) ҡоролма, яйланма; **тормозно́е устро́йство** тормоз яйланмаһы

**УСТУ́П** *м* һикәлтә, киртләс; **усту́п горы́** тау һикәлтәһе

**УСТУПА́ТЬ** *несов. см.* **уступи́ть**

**УСТУПИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* кире; **уступи́тельный сою́з** кире теркәүес

**УСТУПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, кому* биреү; **уступи́ть ме́сто** урын биреү **2.** *кому, в чём* (*отступить*) юл ҡуйыу, ҡаршы килмәү, ҡаршымау; **уступи́ть в спо́ре** бәхәстә ҡаршы килмәү **3.** *кому-чему, в чём* ҡалышыу, бирешеү; **не уступи́ть в хра́брости** батырлыҡта (берәүҙән дә) ҡалышмау **4.** *что, кому; разг.* (*продавая, отдать дешевле*) хаҡын кәметеү (төшөү, төшөрөү); **уступи́ть на пятьдеся́т рубле́й** илле һумға төшөү

**УСТУ́ПКА** *ж* **1.** *см.* **уступи́ть** — **уступа́ть** 1, 2; **2.** (*компромисс*) ташлама, юл ҡуйыу, килешеү; **пойти́ на усту́пки** ташлама яһау **3.** *разг.* (*скидка с назначенной цены*) ташлама хаҡын кәметеү; **прода́ть с усту́пкой** хаҡын кәметеп һатыу

**УСТУ́ПЧАТЫЙ,** -ая, -ое һикәлтәле, киртләсле; **усту́пчатая возвы́шенность** һикәлтәле ҡалҡыулыҡ

**УСТУ́ПЧИВОСТЬ** *ж* килешеүсәнлек, юл ҡуйыусанлыҡ, күндәмлек; **усту́пчивость ма́тери** әсәнең килешеүсәнлеге

**УСТУ́ПЧИВЫЙ,** -ая, -ое килешеүсән, юл ҡуйыусан, күндәм; **усту́пчивый челове́к** килешеүсән кеше

**УСТЫДИ́ТЬ** *сов. кого-что* оялтыу, ҡыҙартыу

**УСТЫДИ́ТЬСЯ** *сов. кого-чего* и *без доп.* оялыу, йөҙ ҡыҙарыу

**У́СТЬЕ** *с* **1.** тамаҡ, йылға тамағы; **у́стье Дёмы** Дим тамағы **2.** (*выход*) ауыҙ; **у́стье коло́дца** ҡоҙоҡ ауыҙы; **у́стье пе́чи** мейес ауыҙы; **у́стье ша́хты** шахта ауыҙы

**УСУГУБИ́ТЬ** и **УСУГУ́БИТЬ** *сов. что* көсәйтеү, киҫкенләштереү, ауырлаштырыу

**УСУГУБИ́ТЬСЯ** и **УСУГУ́БИТЬСЯ** *сов.* көсәйеү, киҫкенләшеү, ауырлашыу

**УСУГУБЛЕ́НИЕ** *с см.* **усугуби́ть** — **усугубля́ть**, **усугуби́ться** — **усугубля́ться**; **усугубле́ние положе́ния** хәлдең киҫкенләшеүе

**УСУГУБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **усугуби́ть**

**УСУГУБЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **усугуби́ться** **2.** *страд. от* **усугубля́ть**

**УСУШИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* киптереп ебәреү (ташлау)

**УСУШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*слишком засушиться*) кибеп китеү **2.** (*убавиться в весе при сушке*) кибеп кәмеү

**УСУ́ШКА** *ж* **1.** *см.* **усуши́ть – усуша́ть, усуши́ться – усуша́ться 2.** *спец.* кибеп кәмеү (*тауарҙың ауырлығы*)

**УСЫ́** *мн.* (*ед.* **ус** *м*) **1.** мыйыҡ; **отрасти́ть усы́** мыйыҡ үҫтереү **2.** *см.* **у́сики** 2; **3.** *см.* **у́сики** 3 ♦ **и в ус не дуть** *см.* **дуть**; **са́ми с уса́ми** үҙебеҙ ҙә беләбеҙ, үҙебеҙҙең дә баш бар; **мота́ть (себе́) на ус** *см.* **мота́ть**

**УСЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **усла́ть**

**УСЫНОВИ́ТЕЛЬ** *м* и **УСЫНОВИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* балалыҡҡа алыусы

**УСЫНОВИ́ТЬ** *сов. кого* балалыҡҡа алыу

**УСЫНОВЛЕ́НИЕ** *с* балалыҡҡа алыу

**УСЫНОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **усынови́ть**

**УСЫПА́ЛЬНИЦА** *ж* төрбә, кәшәнә, маҙар (*бер ырыу йәки күренекле ғаилә ағзаларын күмеү өсөн махсус бина*)

**УСЫ́ПАТЬ** *сов. что* **1.** (*покрыть поверхность чем-л. сыпучим*) һибеү, сәсеү, һибеп (сәсеп) сығыу (тултырыу); **усы́пать доро́жки песко́м** юлдарға ҡом һибеп сығыу **2.** ҡаплау, солғап алыу; **звёзды усы́пали не́бо** күкте йондоҙҙар ҡаплаған

**УСЫПА́ТЬ** *несов. см.* **усы́пать**

**УСЫПИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* йоҡлата торған, йоҡо килтерә торған, йоҡлатҡыс, йоҡо килтергес; **усыпи́тельный го́лос** йоҡо килтергес тауыш

**УСЫПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* йоҡлатыу, йоҡоға талдырыу, йоҡо килтереү, йоҡомһоратыу, ойотоу; **усыпи́ть пе́нием** йыр менән йоҡоно килтереү **2.** *что*; *перен.* йомшартыу, кәметеү, баҫыу; **усыпи́ть бди́тельность** уяулыҡты кәметеү

**УСЫПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **усыпи́ть**

**УСЫПЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **усыпля́ть**

**УСЫХА́ТЬ** *несов. см.* **усо́хнуть**

**УТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **утаи́ть**

**УТА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утаи́ться 2.** *страд. от* **ута́ивать**

**УТАИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*сохранить в тайне*) йәшереү, сер итеп тотоу (һаҡлау); **утаи́ть пра́вду** дөрөҫлөктө йәшереү **2.** (*тайно присвоить*) йәшереү, йәшереп алып ҡалыу, йәшертен үҙләштереү; **утаи́ть чужи́е ве́щи** кеше әйберен йәшертен үҙләштереү ♦ **ши́ла в мешке́ не утаи́шь** беҙ ҡапсыҡта ятмай

**УТАИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*с отрицанием "не"*) йәшеренеп булмай **2.** (*скрыться*) йәшеренеү, ҡасыу; **утаи́ться в ко́мнате** бүлмәлә йәшеренеү

**УТА́ЙКА** *ж см.* **утаи́ть – ута́ивать**; **ута́йка де́нег** аҡсаны йәшереү; **ута́йка пра́вды** дөрөҫлөктө йәшереү

**УТА́ПТЫВАТЬ** *несов. см.* **утопта́ть**

**УТА́ПТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утопта́ться 2.** *страд. от* **ута́птывать**

**УТА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **утащи́ть**

**УТА́СКИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утащи́ться 2.** *страд. от* **ута́скивать**

**УТАЩИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** һөйрәп (һөйрәтеп) алып китеү **2.** (*украсть*) урлау, урлап китеү; **утащи́ть кни́гу** китапты урлау

**УТАЩИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* һөйрәлеү (*ҡыйынлыҡ менән яйлап китеү*)

**У́ТВАРЬ** *ж собир.* кәрәк-яраҡ, йыһаз; **дома́шняя у́тварь** өй кәрәк-яраҡтары

**УТВЕРДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ыңғай; **утверди́тельный отве́т** ыңғай яуап **2.** *грам.* раҫлау; **утверди́тельные части́цы** көсәйтеү-раҫлау киҫәксәләре

**УТВЕРДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* раҫлау, ҡабул итеү; **утверди́ть план рабо́ты** эш планын раҫлау; **утверди́ть но́вый зако́н** яңы закон ҡабул итеү **2.** *что* нығытыу, беркетеү; **утверди́ть опо́ры** терәүҙәр беркетеү **3.** *кого-что, в чём* (*убедить*) ышандырыу, инандырыу; **утверди́ть това́рищей в свое́й правоте́** үҙенең хаҡлығына иптәштәрен ышандырыу

**УТВЕРДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** урынлашыу, нығыу, нығыныу; **поря́док утверди́лся** тәртип урынлашты **2.** ышаныу, инаныу, нығыныу; **утверди́ться в своём мне́нии** үҙ фекереңдә нығыныу

**УТВЕРЖДА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **утверди́ть 2.** *что* әйтеү, һөйләү, раҫлау; **все утвержда́ют, что он прав** бөтәһе лә уны хаҡлы тип әйтәләр

**УТВЕРЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утверди́ться 2.** *страд. от* **утвержда́ть**

**УТВЕРЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **утверди́ть – утвержда́ть, утверди́ться – утвержда́ться 2.** раҫлау, ҡараш, фекер, һүҙ; **пра́вильное утвержде́ние** дөрөҫ фекер

**УТЕКА́ТЬ** *несов. см.* **уте́чь**

**УТЁНОК** *м* өйрәк себеше (бәпкәһе)

**УТЕПЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **утепли́ть 2.** *прил.* йылытылған, йылы; **утеплённая о́бувь** йылы аяҡ кейеме

**УТЕПЛИ́ТЕЛЬ** *м* йылытҡыс; **утепли́тель аккумуля́тора** аккумулятор йылытҡысы

**УТЕПЛИ́ТЬ** *сов.* йылытыу, йылындырыу; **утепли́ть коро́вник** һыйыр аҙбарын йылытыу

**УТЕПЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* йылыныу, йылы кейенеү

**УТЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **утепли́ть**

**УТЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утепли́ться 2.** *страд. от* **утепля́ть**

**УТЕРЕ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* һөртөү, һөртөп алыу; **утере́ть слёзы** күҙ йәштәрен һөртөү; **утере́ть рот** ауыҙҙы һөртөп алыу ♦ **утере́ть нос** *кому* танауына сиртеү

**УТЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һөртөнөү, һөртөнөп алыу; **утере́ться полоте́нцем** таҫтамал менән һөртөнөп алыу

**УТЕРПЕ́ТЬ** *сов.* түҙеп (сыҙап) ҡалыу (тора алыу), түҙә (сыҙай) алыу; **не утерпе́л, что́бы не возрази́ть** ҡаршы әйтмәйенсә түҙә алманы

**УТЕ́РЯ** *ж* юғалтыу, юғалыу, юҡ булыу; **уте́ря докуме́нтов** документтарҙы юғалтыу

**УТЕРЯ́ТЬ** *сов. что* юғалтыу, төшөрөп ҡалдырыу; **утеря́ть де́ньги** аҡса юғалтыу

**УТЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* юғалыу, юҡ булыу; **докуме́нты утеря́лись** документтар юғалды

**УТЁС** *м* ҡая; **взобра́ться на утёс** ҡаяға менеү

**УТЕСА́ТЬ** *сов.* юныу, юнып йоҡартыу (йоҡарта төшөү)

**УТЁСИСТЫЙ,** -ая, -ое ҡаялы; **утёсистый бе́рег** ҡаялы яр

**УТЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **утеса́ть**

**УТЕ́ХА** *ж* **1.** (*забава*) мәрәкә, мәҙәк, уйын-көлкө **2.** (*утешение*) йыуаныс, ҡыуаныс; **дочь — его́ уте́ха** ҡыҙы — уның йыуанысы

**УТЕ́ЧКА** *ж* ағып (ҡойолоп, осоп сығып) кәмеү, исраф булыу; **уте́чка га́за** газдың осоп сығып кәмеүе

**УТЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** ағыу, ағып бөтөү, ағып китеү (кәмеү), ағып сығып (ҡойолоп) бөтөү **2.** *перен.* (*пройти — о времени, событиях*) уҙыу, үтеү, үтеп (уҙып) китеү; **го́ды утекли́** йылдар уҙып китте

**УТЕША́ТЬ** *несов. см.* **уте́шить**

**УТЕША́ТЬСЯ** *несов. см.* **уте́шиться**

**УТЕШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **уте́шить — утеша́ть, уте́шиться — утеша́ться 2.** йыуаныс; **найти́ себе́ утеше́ние** үҙеңә йыуаныс табыу

**УТЕШИ́ТЕЛЬ** *м* и **УТЕШИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* йыуатыусы, йыуаныс биреүсе

**УТЕШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йыуатҡыс, йыуата торған, йыуаныс бирә торған, йыуаныслы, тынысландырғыс, тынысландыра торған; **утеши́тельный отве́т** йыуаныслы яуап

**УТЕ́ШИТЬ** *сов. кого-что* **1.** йыуатыу; **уте́шить ребёнка** баланы йыуатыу **2.** (*порадовать*) йыуаныс биреү, күңел биреү, күңелен күреү

**УТЕ́ШИТЬСЯ** *сов.* йыуаныу, йыуаныс алыу

**УТИЛИЗА́ЦИЯ** *ж* утилизация, утилизациялау, утилләштереү

**УТИЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* утилизациялау, утилләштереү, файҙаланыу, файҙаһын күреү, файҙалы эшкә тотоноу, эшкәртеү; **утилизи́ровать отхо́ды произво́дства** производство ҡалдыҡтарын эшкәртеү

**УТИЛИТАРИ́ЗМ** *м* утилитаризм (*һәр нәмәнән тик матди файҙа күреүҙе күҙ уңында тотоу, тар практицизм*)

**УТИЛИТАРИ́СТ** *м* утилитарист (*утилитаризм рухындағы кеше*)

**УТИЛИТАРИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое утилитарист ...ы, утилитаристарса; **утилитари́стские взгля́ды** утилитарист ҡараштары

**УТИЛИТА́РНЫЙ,** -ая, -ое утилитар; **утилита́рные соображе́ния** утилитар уйҙар; **утилита́рные зна́ния** утилитар белем

**УТИ́ЛЬ** *м собир.* утиль, иҫке-моҫҡо (*производство ҡалдыҡтары, тимер-томор, сепрәк-сапраҡ һ.б.*)

**УТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое утиль ...ы; **ути́льный цех** утиль цехы

**УТИЛЬСЫРЬЁ** *с собир. см.* **ути́ль**

**УТИ́НЫЙ,** -ая, -ое өйрәк ...ы; **ути́ное яйцо́** өйрәк йомортҡаһы

**УТИРА́ТЬ** *несов. см.* **утере́ть**

**УТИРА́ТЬСЯ** *несов. см.* **утере́ться**

**УТИХА́ТЬ** *несов. см.* **ути́хнуть**

**УТИ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** тыныу, тынып ҡалыу, басылыу, баҫыла төшөү; **шум ути́х** тауыш тынды **2.** (*прекратиться*) баҫылыу, туҡтау; **бу́ря ути́хла** дауыл баҫылды; **боль ути́хла** ауыртыу баҫылды **3.** (*успокоиться*) тынысланыу, тымыу; **ребёнок ути́х** бала тымды

**УТИХОМИ́РИВАТЬ** *несов. см.* **утихоми́рить**

**УТИХОМИ́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утихоми́риться 2.** *страд. от* **утихоми́ривать**

**УТИХОМИ́РИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* тынысландырыу, асыуын (ғәйрәтен) баҫыу; **утихоми́рить драчуно́в** һуғыш суҡмарҙарын тынысландырыу

**УТИХОМИ́РИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тынысланыу, баҫылыу; **ма́льчики утихоми́рились** малайҙар тынысланды; **ве́тер утихоми́рился** ел баҫылды

**У́ТКА** *ж* **1.** *зоол.* өйрәк; **ди́кая у́тка** ҡыр өйрәге **2.** (*сосуд*) утка, һейҙек һауыты **3.** (*ложный слух*) ялған хәбәр; **пусти́ть у́тку** ялған хәбәр таратыу

**УТКНУ́ТЬ** *сов. что, во что*; *разг.* **1.** йәшереү, ҡаплау; **уткну́ть лицо́ в воротни́к** йөҙҙө пальто яғаһына йәшереү **2.** *перен.* төбәү, текәлеү, күҙҙе текәү; **уткну́ть глаза́ в кни́гу** китапҡа текәлеү ♦ **уткну́ть нос** баш күтәрмәй ҡаҙалып ултырыу

**УТКНУ́ТЬСЯ** *сов. во что*; *разг.* **1.** сумыу, ҡапланыу, йәшеренеү; **уткну́ться с голово́й в поду́шку** баш менән мендәргә сумыу **2.** *перен.* сумыу, баш күтәрмәү, текәлеп ултырыу; **уткну́ться в кни́гу** китапҡа сумыу

**УТКОНО́С** *м* өйрәкморон (*Австралияла йәшәй торған имеҙеүсе хайуан*)

**У́ТЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*некрепкий*) иҫке, туҙған; **у́тлая ло́дка** иҫке кәмә **2.** (*убогий, бедный*) ярлы, меҫкен; **у́тлая дере́вня** ярлы ауыл

**УТО́К** *м*; *тех.* арҡау (*туҡыу эшендә*)

**УТОЛЕ́НИЕ** с *см.* **утоли́ть — утоля́ть, утоли́ться — утоля́ться**

**УТОЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡандырыу, ҡаныу; **утоли́ть жа́жду** һыуһын ҡандырыу **2.** (*ослабить, умерить*) баҫыу, кәметеү; **утоли́ть боль** ауыртыуҙы баҫыу

**УТОЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡәнәғәтләнеү, ҡаныу, баҫылыу **2.** баҫылыу, кәмеү; **утоли́лась боль** ауыртыу баҫылды

**УТОЛСТИ́ТЬ** *сов. что* йыуанайтыу, ҡалынайтыу, йыуанайта (ҡалынайта) төшөү (биреү); **утолсти́ть верёвку** бауҙы йыуанайта биреү

**УТОЛСТИ́ТЬСЯ** *сов.* йыуанайыу, ҡалынайыу

**УТОЛЩА́ТЬ** *несов. см.* **утолсти́ть**

**УТОЛЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утолсти́ться 2.** *страд. от* **утолща́ть**

**УТОЛЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **утолсти́ть — утолща́ть 2.** ҡалынайған (йыуанайған) урын (ер); **утолще́ние ствола́** олондоң йыуанайған ере

**УТОЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **утоли́ть**

**УТОЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утоли́ться 2.** *страд. от* **утоля́ть**

**УТОМИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ялҡытҡыс (йонсотҡос) булыу; **утоми́тельность ожида́ния** көтөүҙең ялҡытҡыс булыуы

**УТОМИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ялҡытҡыс, арытҡыс, ялыҡтырғыс, йонсотҡос; **утоми́тельная доро́га** йонсотҡос юл; **утоми́тельное путеше́ствие** ялыҡтырғыс сәйәхәт; **утоми́тельный разгово́р** ялҡытҡыс һөйләшеү

**УТОМИ́ТЬ** *сов. кого-что* ялҡытыу, йонсотоу, талдырыу, талсыҡтырыу; **утоми́ть глаза́** күҙҙе талдырыу

**УТОМИ́ТЬСЯ** *сов.* арыу, йонсоу, ялығыу, талсығыу

**УТОМЛЕ́НИЕ** *с* арыу, йонсоу, арығанлыҡ, талғанлыҡ; **у́мственное утомле́ние** баш арығанлығы

**УТОМЛЁННОСТЬ** *ж* арығанлыҡ, йонсоулыҡ, талғанлыҡ; **утомлённость органи́зма** организмдың арығанлығы

**УТОМЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **утоми́ть 2.** *прил.* арыған, йонсоған, талсыҡҡан; **утомлённый вид** йонсоған ҡиәфәт; **утомлённые глаза́** талсыҡҡан күҙҙәр

**УТОМЛЯ́ЕМОСТЬ** *ж* арыусанлыҡ, талыусанлыҡ; **бы́страя утомля́емость органи́зма** организмдың тиҙ арыусанлығы

**УТОМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **утоми́ть**

**УТОМЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см* **утоми́ться 2.** *страд. от* **утомля́ть**

**УТОНУ́ТЬ** *сов. см.* **тону́ть**; **ведро́ утону́ло** күнәк батты; **у́лица утону́ла в зе́лени** урам йәшеллеккә сумған

**УТОНЧА́ТЬ** *несов. см.* **утончи́ть**

**УТОНЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утончи́ться 2.** *страд. от* **утонча́ть**

**УТОНЧЁННОСТЬ** *ж* нескәлек, нәзәкәтлелек; **утончённость нату́ры** кеше тәбиғәтенең нәзәкәтлелеге

**УТОНЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **утончи́ть 2.** *прил.* (*изощрённый*) нескә, нәзәкәтле, һиҙгер, үткер, нескә зауыҡлы; **утончённые мане́ры** нәзәкәтле ҡыланыштар

**УТОНЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** йоҡартыу, нәҙегәйтеү, нескәртеү; **утончи́ть ни́тку** епте нәҙегәйтеү **2.** (*сделать более изысканным*) нескәртеү, нәзәкәтләндереү; **утончи́ть вкус** зауыҡты нескәртеү

**УТОНЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать более тонким*) нескәреү, нәҙегәйеү, йоҡарыу; **нить утончи́лась** еп йоҡарҙы **2.** (*стать более изысканным*) нескәреү, нәҙегәйеү, нәзәкәтлегә әйләнеү

**УТО́ПАТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *см.* **утопта́ть**; **уто́пать доро́жку** юлды таҡырайтыу **2.** *см.* **уйти́** 1; **уто́пать домо́й** өйгә ҡайтып китеү

**УТОПА́ТЬ** *несов. см.* **тону́ть**; **дом утопа́ет в зе́лени** йорт йәшеллеккә күмелгән ♦ **утопа́ть в слеза́х** күҙ йәшенә күмелеү

**УТОПА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **утопа́ть 2.** *в знач. сущ.* **утопа́ющий** *м* батып барыусы ♦ **утопа́ющий хвата́ется за соло́минку** батып барған һаламға тотонған

**УТОПИ́ЗМ** *м*; *книжн.* утопизм

**УТОПИ́СТ** *м* утопист (**1.** *утопик социализмды яҡлаусы* **2.** *хыялый*, *фантазёр*)

**УТОПИ́ТЬ** *сов. см.* **топи́ть** II; **утопи́ть су́дно неприя́теля** дошмандың карабын батырыу

**УТОПИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **топи́ться** II 1

**УТОПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое утопик; **утопи́ческие взгля́ды** тормошҡа ашмаҫлыҡ ҡараштар; **утопи́ческий рома́н** утопик роман ♦ **утопи́ческий социали́зм** утопик социализм

**УТОПИ́ЧНОСТЬ** *ж* утопиялылыҡ

**УТОПИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **утопи́ческий** 2; **утопи́чный за́мысел** утопик уй

**УТО́ПИЯ** *ж* утопия (**1.** *фәнни нигеҙләнмәгән идеаль ижтимағи киләсәк тәғлимәте* **2.** *йәмғиәт үҫешендәге объектив законлыҡтарҙан тыш идеаль ижтимағи төҙөлөштө һүрәтләгән әҙәби әҫәр* **3.** *тормошҡа ашмаҫлыҡ хыял*, *утопия*)

**УТО́ПЛЕННИК** *м* и **УТО́ПЛЕННИЦА** *ж* һыуға батҡан кеше

**УТОПТА́ТЬ** *сов. что* таҡырайтыу, таҡырлау, тапап нығытыу (тигеҙләү, тығыҙлау); **утопта́ть зе́млю** ерҙе таҡырлау

**УТОПТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тапалып нығыныу (тигеҙләнеү), таҡырайыу, таҡырланыу

**УТОЧНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **уточни́ть — уточня́ть 2.** аныҡлыҡ, асыҡлыҡ, төҙәтмә; **внести́ уточне́ние** төҙәтмә индереү

**УТОЧНИ́ТЬ** *сов. что* аныҡлау, асыҡлау, аныҡлыҡ (асыҡлыҡ) индереү

**УТОЧНИ́ТЬСЯ** *сов.* аныҡланыу, асыҡланыу; **формулиро́вки уточни́лись** формулировкалар асыҡланды

**УТОЧНЯ́ТЬ** *несов. см.* **уточни́ть**

**УТОЧНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уточни́ться 2.** *страд. от* **уточня́ть**

**УТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **утро́ить**

**УТРА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утро́иться 2.** *страд. от* **утра́ивать**

**УТРАМБО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **утрамбова́ть 2.** *прил.* таҡыр, тигеҙ; **утрамбо́ванная доро́га** таҡыр юл

**УТРАМБОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** тыңҡыслау, тығыҙлау; **утрамбова́ть зе́млю** ерҙе тығыҙлау **2.** (*утоптать*) таҡырайтыу, тигеҙләү

**УТРАМБОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тыңҡысланыу, тығыҙланыу **2.** таҡырланыу, таҡырайыу, тигеҙләнеү

**УТРА́ТА** *ж* **1.** *см.* **утра́тить — утра́чивать**, **утра́титься — утра́чиваться 2.** (*потеря*, *урон*) юғалтыу, зарар, зыян; **понести́ утра́ту** юғалтыу кисереү

**УТРА́ТИТЬ** *сов. кого-что* юғалтыу; **прика́з утра́тил си́лу** приказ көсөн юғалтты; **утра́тить трудоспосо́бность** эшләү һәләтен юғалтыу

**УТРА́ТИТЬСЯ** *сов.* юғалыу, юҡҡа сығыу, бөтөү; **ста́рые тради́ции утра́тились** элекке йолалар юғалып бөттө

**УТРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **утра́тить**

**УТРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утра́титься** **2.** *страд. от* **утра́чивать**

**У́ТРЕННИЙ,** -яя, -ее **1.** иртәнге, иртәнсәкке; **у́тренние часы́** иртәнге ваҡыт; **у́тренняя заря́дка** иртәнге зарядка **2.** иртәнге, таңғы; **у́тренний ветеро́к** таңғы ел

**У́ТРЕННИК** *м* **1.** утренник; **де́тский у́тренник** балалар утренниғы (*бергә байрам уңайы менән балалар өсөн ойошторола торған уйын-тамаша*) **2.** (*утренний мороз*) иртәнге һалҡын

**УТРИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* аштырыу, аштырып ебәреү, ҡабартыу, ҡабартып ебәреү, күпертеү, күпертеп күрһәтеү; **утри́ровать слова́** *чьи-л. кемдеңдер* һүҙҙәрен ҡабартып ебәреү

**УТРИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **утри́ровать**

**У́ТРО** *с* иртә, иртәнсәк; (*раннее*) таң; **весе́ннее у́тро** яҙғы иртә; **под у́тро** таң алдынан ♦ **с до́брым у́тром!** хәйерле иртә!; **у́тро ве́чера мудрене́е** иртәнге эш хәйерле (*эште, мәсьәләне хәл итеүҙе иртәнгә ҡалдырыу яҡшы*)

**УТРО́БА** *ж* ҡарын, ҡорһаҡ, эс; **в утро́бе ма́тери** инә ҡарынында ♦ **ненасы́тная утро́ба** *кто*; *прост., бран.* туймаҫ тамаҡ (ҡорһаҡ)

**УТРО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡарындағы, инә ҡарынындағы; **утро́бный пери́од разви́тия** инә ҡарынындағы үҫеш осоро **2.** (*о звуке*) күкрәктән сыҡҡан, ҡалын; **утро́бный го́лос** күкрәктән сыҡҡан тауыш

**УТРОЕ́НИЕ** *с см.* **утро́ить**, **утро́иться**

**УТРО́ЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **утро́ить** **2.** *прил.* өсләтә, өс тапҡыр арттырылған; **утро́енный объём** өс тапҡыр арттырылған күләм

**УТРО́ИТЬ** *сов. что* өс тапҡыр (мәртәбә) арттырыу, өсләтә арттырыу; **утро́ить уси́лия** тырышлыҡты өсләтә арттырыу

**УТРО́ИТЬСЯ** *сов.* өс тапҡыр (мәртәбә) артыу, өсләтә артыу; **си́лы утро́ились** көс өсләтә артты

**У́ТРОМ** *нареч.* иртән, иртәнсәк, иртә менән, таң менән, иртүк; **уе́хать у́тром** иртән китеү

**УТРУЖДА́ТЬ** *несов. кого-что* мәшәҡәтләү, борсоу, бимазалау; **утружда́ть про́сьбами** үтенестәр менән мәшәҡәтләү

**УТРУ́СКА** *ж*; *спец.* **1.** (*уменьшение веса при пересыпке, перевозе и т.п.*) түгелеп-сәселеп кәмеү **2.** (*недостающее количество сыпучих тел, утраченное при пересыпке и т.п.*) түгелгән-сәселгән, түгелгән-сәселгән өлөшө, ҡойолған өлөшө

**УТРЯСА́ТЬ** *несов. см.* **утрясти́**

**УТРЯСА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утрясти́сь** **2.** *страд. от* **утряса́ть**

**УТРЯ́СКА** *ж*; *разг. см.* **утрясти́** — **утряса́ть** 3

**УТРЯСТИ́** *сов.* **1.** *что* һелкетеп баҫтырыу, бүҫкәртеү; **утрясти́ муку́ в мешке́** тоҡтағы ондо һелкетеп баҫтырыу **2.** *обычно безл.*; *разг.* (*измучить*) йонсотоу, тәнде һыныҡтырыу (ватыу); **в доро́ге утрясло́** юлда йонсотто **3.** *что*; *разг.* рәтләү, көйләү, яйлау; **утрясти́ сло́жный вопро́с** ҡатмарлы мәсьәләне яйлау

**УТРЯСТИ́СЬ** *сов.* **1.** *разг.* һелкенә-һелкенә (һелкенеүҙән) баҫылыу; **мука́ утрясла́сь** он һелкенеүҙән баҫылған **2.** *прост.* һелкенеп барып тән ватылыу (һыныҡыу); **утрясти́сь в теле́ге** арбала һелкенеп барып тән һыныҡыу **3.** *разг.* (*уладиться*) рәтләнеү, көйләнеү, яйланыу; **вопро́сы утрясли́сь** мәсьәләләр көйләнде

**УТЫ́КАТЬ** *сов. что, чем* **1.** *разг.* сәнсеп (ҡаҙап) бөтөрөү, ҡаҙап сығыу; **уты́кать поду́шечку иго́лками** күпсеккә энәләр ҡаҙап сығыу **2.** тығып сығыу, тығыу, ҡыҫтырыу, һыҙлыҡлау; **уты́кать ще́ли па́клей** ярыҡтарға сүбәк тығыу

**УТЫКА́ТЬ I** *несов. см.* **уткну́ть**

**УТЫКА́ТЬ II** *несов. см.* **уты́кать**

**УТЫ́КАТЬСЯ** *сов.*; *прост.* (төрлө яҡлап) ҡыҫтырылыу, тығылыу

**УТЫКА́ТЬСЯ I** *несов. см.* **уткну́ться**

**УТЫКА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **уты́каться** **2.** *страд. от* **утыка́ть** II

**УТЫ́КИВАТЬ** *несов. см.* **уты́кать**

**УТЮ́Г** *м* үтек; **электри́ческий утю́г** электр үтеге

**УТЮ́ЖИТЬ** *несов.* **1.** *что*; *разг.* үтекләү; **утю́жить брю́ки** салбар үтекләү **2.** *кого*; *перен., прост.* (*колотить*) туҡмау, дөмбәҫләү

**УТЮ́ЖКА** *ж см.* **утю́жить**

**УТЯЖЕЛИ́ТЕЛЬ** *м*; *спец.* ауырайтҡыс; **утяжели́тель гли́нистого раство́ра** балсыҡ иҙмәһен ауырайтҡыс

**УТЯЖЕЛИ́ТЬ** *сов.* ауырайтыу, ауырлығын арттырыу, һәлмәкләтеү; **утяжели́ть маши́ну** машинаны ауырайтыу

**УТЯЖЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* ауырайыу, һәлмәкләнеү

**УТЯЖЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **утяжели́ть**

**УТЯЖЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **утяжели́ться** **2.** *страд. от* **утяжеля́ть**

**УТЯНУ́ТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *кого-что* һөйрәп (көсләп) алып китеү; **утяну́ть на конце́рт** концертҡа һөйрәп алып китеү **2.** *что* тартып (ҡыҫып) быуыу; **утяну́ть та́лию** билде ҡыҫып быуыу **3.** *кого-что*; *перен.* (*украсть*) урлап китеү, сәлдереү

**УТЯ́ТИНА** *ж* өйрәк ите

**УФ** *межд.* уф, уһ; **уф, уста́л!** уф, арыным!

**УХ** *межд.* уһ, аһ, ух; **ух, како́й большо́й!** уһ, ниндәй ҙур!

**УХА́** *ж* балыҡ һурпаһы, балыҡ ашы; **о́куневая уха́** алабуға һурпаһы

**УХА́Б** *м* һикәлтә, урғылыйын, соҡор-саҡыр (*юлдағы*)

**УХА́БИНА** *ж*; *разг. см.* **уха́б**

**УХА́БИСТЫЙ,** -ая, -ое һикәлтәле, соҡорло-саҡырлы; **уха́бистая доро́га** һикәлтәле юл

**УХАЖЁР** *м*; *прост.* **1.** ҡатын-ҡыҙ күңелен күреүсе **2.** *чей* һөйөүсе, яратыусы, ғашиҡ (кеше)

**УХА́ЖИВАНИЕ** *с см.* **уха́живать**

**УХА́ЖИВАТЬ** *несов.* **1.** *за кем-чем* ҡарау, тәрбиәләү, ҡарап тәрбиәләп тороу, ҡарап үҫтереү; **уха́живать за больны́м** ауырыуҙы тәрбиәләү; **уха́живать за цвета́ми** гөлдәрҙе ҡарау **2.** *за кем* артынан йөрөү, күңелен күреү (күрергә тырышыу); **уха́живать за де́вушкой** ҡыҙ артынан йөрөү

**У́ХАНЬЕ** *с*; *разг. см.* **у́хать** 1, 2

**У́ХАРСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* егеттәрсә, егеттәргә хас, елле; **у́харский вид** егеттәрсә ҡиәфәт

**У́ХАРСТВО** *с*; *разг.* егетлек, егетләнеү, ҡыйыулыҡ, саялыҡ

**У́ХАРСТВОВАТЬ** *несов.*; *разг.* егетләнеү, егетлек күрһәтеү, саяланыу, саялыҡ күрһәтеү

**У́ХАРЬ** *м*; *разг.* сая кеше, егет кеше

**У́ХАТЬ** *несов. см.* **у́хнуть**

**У́ХАТЬСЯ** *несов. см.* **у́хнуться**

**УХВА́Т** *м* суйын тотҡос

**УХВА́ТИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** сос ҡуллы, оҫолло; **ухва́тистые ру́ки** оҫолло ҡулдар **2.** сос, үткер; **ухва́тистый па́рень** сос егет

**УХВАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* эләктереү, эләктереп (тотоп) алыу; **ухвати́ть за́ ногу** аяғынан эләктереү **2.** *что*; *разг.* тотоп алыу, аңлау, төшөнөү; **ухвати́ть мысль собесе́дника** әңгәмәсенең фекерен тотоп алыу

**УХВАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *за кого-что* тотоноу, йәбешеү, тотоноп ҡалыу, йәбешеп алыу (ҡалыу); **ухвати́ться за пери́ла** яндауырға тотоноу **2.** *за что*; *разг.* (*приняться, взяться*) тотоноу, керешеү, сат йәбешеү; **ухвати́ться за но́вую те́му** яңы темаға тотоноу; **ухвати́лся за де́ло** эшкә сат йәбеште

**УХВА́ТКА** *ж*; *разг.* **1.** (*манера поведения*) ҡыланыш, ҡылыҡ; **молоде́цкая ухва́тка** егеттәрсә ҡыланыш **2.** (*ловкость*) булдыҡлылыҡ, таҫыллыҡ, оҫталыҡ; **он берёт ухва́ткой** ул таҫыллыҡ менән алдыра

**УХВА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **ухвати́ть**

**УХВА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ухвати́ться** **2.** *страд. от* **ухва́тывать**

**УХИТРИ́ТЬСЯ** *сов. с неопр.*; *разг.* аҡыл (баш) етеү, әмәлен (хәйләһен) табыу, булдыра алыу, яйын табыу; **ухитри́лись сде́лать** эшләргә әмәлен табыу

**УХИТРЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **ухитри́ться**

**УХИЩРЕ́НИЕ** *с* хәйлә, әмәл, оҫталыҡ, хәйләкәрлек, этлек; **прибега́ть к ра́зным ухищре́ниям** төрлө хәйләләр ҡороу

**УХИЩРЁННОСТЬ** *ж* хәйләлек, хәйләкәрлек, мутлыҡ

**УХИЩРЁННЫЙ,** -ая, -ое хәйләле, хәйләкәр, мут

**УХИЩРЯ́ТЬСЯ** *несов.* хәйләләү, мутлашыу, яйын (әмәлен) табыу

**УХЛО́ПАТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *кого-что* (*убить*) үлтереү, юҡ итеү, башына етеү **2.** *что* (*истратить*) тотоноп бөтөү, туҙҙырыу, сарыф итеү; **ухло́пать мно́го де́нег** бик күп аҡса туҙҙырыу

**УХЛО́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **ухло́пать**

**УХМЫ́ЛКА** *ж*; *разг.* көлөмһөрәү, аҫтыртын йылмайыу, көлөү

**УХМЫЛЬНУ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* көлөмһөрәү, аҫтыртын йылмайыу

**УХМЫЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **ухмыльну́ться**

**У́ХНУТЬ** *сов.* **1.** *разг.* бух итеү; **у́хнула бо́мба** бомба бух итеп ҡалды **2.** уһылдау, уһ итеү; **фи́лин у́хнул** өкө уһылданы **3.** *прост.* (*упасть, провалиться*) сумыу, батыу, батып китеү; **у́хнуть в сугро́б** көрткә сумыу **4.** *что*; *перен.* (*израсходовать*) тотоноу, (самаһыҙ) туҙҙырыу, сама белмәй файҙаланыу; **у́хнуть у́йму де́нег** бик күп аҡса туҙҙырыу

**У́ХНУТЬСЯ** *сов.*; *прост.* лап итеп ҡалыу, лап итеп барып төшөү; **у́хнуться в я́му** соҡорға лап итеп барып төшөү

**У́ХО** *с* **1.** *в разн. знач.* ҡолаҡ; **сре́днее у́хо** урта ҡолаҡ; **взять за́ ухо** ҡолағынан эләктереп алыу; **чу́ткое у́хо** һиҙгер ҡолаҡ; **у́ши ведра́** күнәк ҡолағы **2.** ҡолаҡсын; **ша́пка с уша́ми** ҡолаҡсынлы кәпәс ♦ **в одно́ у́хо вошло́, а в друго́е вы́шло** бер ҡолаҡтан инде, икенсеһенән сыҡты (*иғтибарһыҙ тыңлау*); **во все у́ши слу́шать** ҡолаҡ торғоҙоп тыңлау; **в уша́х (у́хе) звени́т** *см.* **звене́ть**; **дать в у́хо** ҡолаҡ төбөнә тондороу; **держа́ть у́хо востро́** *см.* **востро́**; **за́ уши тащи́ть** *кого* ҡолағынан һөйрәү (*берәй эште башҡарыуҙа ярҙамлашыу*); **и у́хом не ведёт** ҡолағына ла элмәй; **навостри́ть у́ши** *см.* **навостри́ть**; **надра́ть у́ши** *см.* **надра́ть**; **на́ ухо говори́ть** ҡолағына әйтеү, сер итеп әйтеү; **по́ уши влюби́ться** мөкиббән ғашиҡ булыу; **по́ уши в долга́х** муйындан бурысҡа батыу; **туго́й на́ ухо** ҡолаҡҡа ҡаты; **у́хо ре́жет** ҡолаҡты ярып бара; **медве́дь на́ ухо наступи́л** *см.* **медве́дь**; **прожужжа́ть у́ши** (мыжып) ҡолаҡ итен ашау; **прокрича́ть у́ши** ҡолаҡты тондороу

**УХОВЁРТКА** *ж* асалыҡойроҡ (*бөжәк*)

**УХО́Д I** *м см.* **уходи́ть** 1; **ухо́д с рабо́ты** эштән китеү

**УХО́Д II** *м* ҡарау, тәрбиәләү; **ухо́д за посе́вами** сәсеүлектәрҙе ҡарау; **ухо́д за ра́неными** яралыларҙы тәрбиәләү

**УХОДИ́ТЬ I** *несов.* **1.** *см.* **уйти́** **2.** китеү, йүнәлеү, һуҙылыу, юлланыу, юл алыу; **доро́га ухо́дит в лес** юл урманға табан китә ♦ **уходи́ть ме́жду па́льцами (сквозь па́льцы)** ҡомға һеңгән һыу кеүек, юҡҡа сығыу

**УХОДИ́ТЬ II** *сов. обычно в форме прич.* ҡарау, тәрбиәләү

**УХО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **уходи́ть** II; **ухо́женный скот** ҡаралған мал **2.** *прил.*

ҡараулы, тәрбиәле; **ухо́женный ребёнок** ҡараулы бала

**УХУДША́ТЬ** *несов. см.* **уху́дшить**

**УХУДША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уху́дшиться** **2.** *страд. от* **ухудша́ть**

**УХУДШЕ́НИЕ** *с см.* **уху́дшить** – **ухудша́ть, уху́дшиться** – **ухудша́ться**; **ухудше́ние здоро́вья** һаулыҡтың насарланыуы

**УХУ́ДШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уху́дшить** **2.** *прил.* насарайған, насарланған; **уху́дшенная поро́да** насарайған тоҡом

**УХУ́ДШИТЬ** *сов. что* насарайтыу, насарлатыу, насарландырыу

**УХУ́ДШИТЬСЯ** *сов.* насарайыу, насарланыу, мөшкөлләнеү

**УЦЕЛЕ́ТЬ** *сов.* имен ҡалыу, иҫән (һау) ҡалыу, һаҡланып ҡалыу; **дом уцеле́л во вре́мя пожа́ра** өй янғындан имен ҡалды; **уцеле́ть от холе́ры** вабанан иҫән ҡалыу

**УЦЕНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **уцени́ть** **2.** *прил.* хаҡы төшөрөлгән (кәметелгән); **уценённые това́ры** хаҡы төшөрөлгән тауарҙар

**УЦЕ́НИВАТЬ** *несов. см.* **уцени́ть**

**УЦЕНИ́ТЬ** *сов. что*; *торг.* хаҡын төшөрөү (кәметеү), осһоҙайтыу; **уцени́ть това́р** тауарҙың хаҡын төшөрөү

**УЦЕ́НКА** *ж*; *торг.* **1.** *см.* **уцени́ть** – **уце́нивать**; **произвести́ уце́нку о́буви** аяҡ кейемдәренең хаҡын төшөрөү **2.** (*скидка в цене*) хаҡтың кәметелгән (төшөрөлгән) өлөшө

**УЦЕПИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* эләктереү, эләктереп алыу, тотоп алыу, ҡаптырыу; **уцепи́ть коне́ц верёвки** бауҙың осон эләктереү

**УЦЕПИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** *за кого-что* йәбешеү, йәбешеп алыу, сат йәбешеү, тотоноп алыу; **уцепи́ться за рука́в** еңенә йәбешеү **2.** *за что*; *разг.* йәбешеү, эләктереп алыу, элеп алыу; **уцепи́ться за мысль** *чью-л. кемдеңдер* фекерен эләктереп алыу

**УЦЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **уцепи́ть**

**УЦЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уцепи́ться** **2.** *страд. от* **уцепля́ть**

**УЧА́СТВОВАТЬ** *несов. в чём* **1.** ҡатнашыу, ҡатнашлыҡ итеү; **уча́ствовать в войне́** һуғышта ҡатнашыу; **уча́ствовать в стро́йке** төҙөлөштә ҡатнашыу **2.** (*иметь долю в чём-л.*) уртаҡлашыу, бүлешеү, уртаҡ (бергәләп) күтәреү; **уча́ствовать в расхо́дах** сығымдарҙы уртаҡлашыу

**УЧА́СТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **уча́ствовать** **2.** *в знач. сущ.* **уча́ствующие** *мн.* ҡатнашыусылар

**УЧА́СТИЕ** *с* **1.** ҡатнашыу, ҡатнашлыҡ; **приня́ть уча́стие в вы́борах** һайлауҙарҙа ҡатнашыу **2.** (*сочувствие*) теләктәшлек, уртаҡлашыу; **прояви́ть уча́стие** теләктәшлек күрһәтеү

**УЧАСТИ́ТЬ** *сов. что* йышайыу, йышлатыу; **участи́ть шаги́** аҙымдарҙы йышайтыу; **участи́ть посеще́ния** килеп йөрөүҙәрҙе йышайтыу

**УЧАСТИ́ТЬСЯ** *сов.* йышайыу, йышая барыу (төшөү); **шаги́ участи́лись** аҙымдар йышайҙы

**УЧАСТКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** участка ...ы; **участко́вая избира́тельная коми́ссия** участка һайлау комиссияһы **2.** *в знач. сущ.* **участко́вый** *м*; *разг.* (*милиционер*) участковый

**УЧА́СТЛИВОСТЬ** *ж* мәрхәмәтлелек, шәфҡәтлелек

**УЧА́СТЛИВЫЙ,** -ая, -ое ҡайғыны уртаҡлашыусан, мәрхәмәтле, шәфҡәтле; **уча́стливый челове́к** мәрхәмәтле кеше

**УЧА́СТНИК** *м* и **УЧА́СТНИЦА** *ж* ҡатнашыусы, ҡатнашҡан кеше; **уча́стник войны́** һуғышта ҡатнашыусы; **уча́стник соревнова́ния** ярышта ҡатнашыусы

**УЧА́СТОК** *м* **1.** урын, өлөш; **поражённый уча́сток ко́жи** тиренең зарарланған урыны **2.** бүлем, биләмә, участка; **земе́льный уча́сток** ер бүлеме **3.** участка; **избира́тельный уча́сток** һайлау участкаһы **4.** урын, участка; **уча́сток оборо́ны полка́** полктың оборона тотҡан урыны **5.** тармаҡ, өлкә; **передово́й уча́сток рабо́ты** эштең алдынғы тармағы **6.** бүлексә, участка; **уча́сток поли́ции** полиция бүлексәһе

**У́ЧАСТЬ** *ж* яҙмыш, тәҡдир, өлөш; **го́рькая у́часть** әсе яҙмыш; **их пости́гла та же у́часть** уларға ла шундай уҡ яҙмыш төштө

**УЧАЩА́ТЬ** *несов. см.* **участи́ть**

**УЧАЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **участи́ться** **2.** *страд. от* **учаща́ть**

**УЧАЩЕ́НИЕ** *с см.* **участи́ть** – **учаща́ть, участи́ться** – **учаща́ться**; **учаще́ние сердцебие́ния** йөрәк тибешенең йышайыуы

**УЧАЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **участи́ть** **2.** *прил.* йыш, йыш-йыш; **учащённый пульс** йөрәктең йыш тибеүе

**УЧА́ЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся **1.** *прич. от* **учи́ться** **2.** *в знач. сущ.* **уча́щийся** *м* и **уча́щаяся** *ж* уҡыусы; **конце́рт для уча́щихся** уҡыусылар өсөн концерт

**УЧЁБА** *ж* уҡыу, белем алыу, өйрәнеү; **отли́чники учёбы** уҡыу отличниктары

**УЧЕ́БНИК** *м* дәреслек; **шко́льный уче́бник** мәктәп дәреслеге; **уче́бник исто́рии** тарих дәреслеге

**УЧЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** уҡыу ...ы; **уче́бный год** уҡыу йылы; **вы́сшее уче́бное заведе́ние** юғары уҡыу йорто **2.** уҡыу ...ы, уҡыу-уҡытыу ...ы; **уче́бная часть** уҡыу-уҡытыу бүлеге, уҡыу-уҡытыу эштәре бүлеге; **уче́бный план** уҡыу планы **3.** өйрәнеү ...ы, өйрәтеү ...ы, күнегеү ...ы; **уче́бная стрельба́** өйрәнеү атыштары; **уче́бное су́дно** өйрәнеү судноһы

**УЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **учи́ть** – **учи́ться** **2.** тәғлимәт, ғилем; **материалисти́ческое уче́ние** материалистик тәғлимәт **3.** *обычно мн.* **уче́ния**; *воен.* күнегеүҙәр, өйрәтмәләр

**УЧЕНИ́К** *м* и **УЧЕНИ́ЦА** *ж* **1.** уҡыусы; **учени́к сре́дней шко́лы** урта мәктәп уҡыусыһы **2.** өйрәнсек; **учени́к то́каря** токарь өйрәнсеге

3. (*последователь*) шәкерт, уҡыусы; **достóйный ученúк своегó учúтеля** үҙ остазының лайыҡлы шәкерте

**УЧЕНÚЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** уҡыусы ...ы, уҡыусылар ...ы; **ученúческий дневнúк** уҡыусы көндәлеге **2.** (*незрелый, несамостоятельный*) уҡыусыларса, өйрәнсек; **ученúческие рассуждéния** уҡыусыларса фекерләү

**УЧЕНÚЧЕСТВО** *с* **1.** уҡыу, уҡыусылыҡ; **гóды ученúчества** уҡыу йылдары **2.** (*обучение квалифицированному труду*) өйрәнсеклек, өйрәнсектәр ...ы; **шкóла фабрúчно-заводскóго ученúчества** фабрика-завод өйрәнсектәр мәктәбе **3.** (*незрелость*) үҙ аллы булмау, өйрәнсек

**УЧЁНОСТЬ** *ж* ғалимлыҡ, белемлелек, белемле булыу, уҡымышлылыҡ, ғилемлелек; **выделя́ться своéй учёностью** үҙенең ғилемлелеге менән айырылып тороу

**УЧЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*выдрессированный*) өйрәтелгән; **учёные медвéди** өйрәтелгән айыуҙар **2.** уҡымышлы, белемле, уҡыған, ғалим; **учёные лю́ди** уҡыған кешеләр **3.** (*научный*) ғилми, фәнни; **учёная стéпень** ғилми дәрәжә; **учёный совéт** ғилми совет; **учёный спор** фәнни бәхәс **4.** *в знач. сущ.* **учёный** *м* (*о мужчине*) ғалим; (*о женщине*) ғалимә; **вúдные учёные** күренекле ғалимдар

**УЧÉСТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*подсчитать*) иҫәпкә (хисапҡа) алыу, хисаплау, барлау; **учéсть расхóды** сығымдарҙы иҫәпкә алыу **2.** *что* (*принять во внимание*) иҫәпкә алыу, күҙҙә (күҙ уңында) тотоу, иғтибарға алыу; **учéсть прéжний óпыт** элекке тәжрибәне иҫәпкә алыу **3.** (*с дополнительным придаточным*) -ды/-де иҫтә тотоу (онотмау); -ды/-де иҫтән (хәтерҙән) сығармау; **учтúте, что дорóга трýдная** юл ауыр икәнде иҫтә тотоғоҙ

**УЧЁТ** *м* **1.** *см.* **учéсть — учúтывать**; **учёт товáров** тауарҙарҙы иҫәпкә алыу (барлау) **2.** учёт, иҫәп; **взять на учёт** иҫәпкә алыу

**УЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** учёт ...ы, иҫәпкә алыу ...ы, хисап (барлау) ...ы; **учётная кáрточка** учёт карточкаһы **2.** *фин.* (*относящийся к учёту векселей*) векселдәрҙе исәпкә алыу ...ы, векселдәрҙе барлау ...ы; **учётный банк** векселдәрҙе иҫәпкә алыу банкыһы

**УЧЁТЧИК** *м* и **УЧЁТЧИЦА** *ж* хисапсы, иҫәпсе; **учётчик бригáды** бригада хисапсыһы

**УЧÚЛИЩЕ** *с* училище; **педагогúческое учúлище** педагогия училищеһы

**УЧИНÚТЬ** *сов. что*; *разг.* эшләү, яһау, сығарыу, ҡуптарыу; **учинúть шум** шау-шыу ҡуптарыу; **учинúть скандáл** янъял сығарыу

**УЧИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **учинúть**

**УЧÚТЕЛЬ** *м* **1.** (*мн.* **учителя́**) уҡытыусы, мөғәллим; **учúтель рýсского языкá** урыҫ теле уҡытыусыһы **2.** (*мн.* **учúтели**) остаз

**УЧÚТЕЛЬНИЦА** *ж* уҡытыусы, мөғәллимә

**УЧÚТЕЛЬСКАЯ** *ж* уҡытыусылар бүлмәһе (*мәктәптә*)

**УЧÚТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое **1.** уҡытыусы(лар) ...ы, уҡытыусылыҡ ...ы **2.** (*такой, как у учителя*) уҡытыусы ...ы, уҡытыусыға хас

**УЧÚТЕЛЬСТВО** *с* **1.** (*деятельность учителя*) уҡытыусылыҡ, уҡытыусылыҡ эше (хеҙмәте); **занимáться учúтельством** уҡытыусылыҡ эше менән шөғөлләнеү **2.** *собир.* (*учителя*) уҡытыусылар; **роль учúтельства** уҡытыусылар роле

**УЧÚТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов.* уҡытыу, уҡытыусылыҡ итеү, уҡытыусы булып эшләү

**УЧÚТЫВАТЬ** *несов. см.* **учéсть**

**УЧÚТЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **учúтывать**

**УЧÚТЬ** *несов.* **1.** *кого-что, чему* и *с неопр.* уҡытыу, өйрәтеү; **учúть матемáтике** математиканан уҡытыу **2.** (*быть учителем, преподавать*) уҡытыу, уҡытыусы булыу; **учúть в начáльных клáссах** башланғыс кластарҙа уҡытыу **3.** *разг.* (*наставлять*) өйрәтеү, өгөт-нәсихәт биреү; **учúть дéлать добрó** изгелек итергә (эшләргә) өйрәтеү; **учúть умý-рáзуму** аҡыл биреү, аҡыл өйрәтеү **4.** *с союзом "что"* (*обосновывать, развивать*) өйрәтеү, һабаҡ биреү

**УЧÚТЬСЯ** *несов.* **1.** өйрәнеү; **учúться мýзыке** музыкаға өйрәнеү; **учúться катáться на конькáх** конькиҙа шыуырға өйрәнеү **2.** уҡыу; **учúться в инститýте** институтта уҡыу **3.** *прост.* (*приобретать профессию*) өйрәнеү, уҡыу; **учúться на слесáря** слесарлыҡҡа уҡыу **4.** *страд. от* **учúть** 1, 3

**УЧРЕДÚТЕЛЬ** *м* и **УЧРЕДÚТЕЛЬНИЦА** *ж* ҡороусы, ойоштороусы, ҡороп (ойоштороп) ебәреүсе, асыусы, асып ебәреүсе, ҡороуға (асыуға) көс һалыусы

**УЧРЕДÚТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡороу ...ы, ойоштороу ...ы; **учредúтельный съезд** ойоштороу съезы ♦ **Учредúтельное собрáние** *ист.* Учредителдәр йыйылышы

**УЧРЕДÚТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое ойоштороусы(лар) ...ы; **учредúтельское совещáние** ойоштороусылар кәңәшмәһе

**УЧРЕДÚТЬ** *сов. что* **1.** (*основать*) ойоштороу, ойоштороп ебәреү, төҙөү, нигеҙ һалыу; **учредúть наýчное óбщество** ғилми йәмғиәт ойоштороу **2.** (*ввести*) булдырыу, индереү, урынлаштырыу; **учредúть нóвые услóвия** яңы шарттар булдырыу

**УЧРЕДÚТЬСЯ** *сов.* **1.** (*основаться*) ойошторолоу; **учредúлось нóвое спортúвное óбщество** яңы спорт йәмғиәте ойошторолдо **2.** *страд. от* **учредúть**

**УЧРЕЖДÁТЬ** *несов. см.* **учредúть**

**УЧРЕЖДÁТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **учредúться** **2.** *страд. от* **учреждáть**

**УЧРЕЖДÉНИЕ** *с* **1.** *см.* **учредúть — учреждáть** **2.** (*организация*) учреждение; **госудáрственное учреждéние** дәүләт учреждениеһы; **наýчное учреждéние** ғилми учреждение

**УЧРЕЖДÉНЧЕСКИЙ,** -ая, -ое учреждение ...ы; **учреждéнческий аппарáт** учреждение аппараты

**УЧТИ́ВОСТЬ** *ж* илтифатлылыҡ, әҙәплелек, ихтирамлылыҡ; **учти́вость де́вушки** ҡыҙҙың илтифатлылығы

**УЧТИ́ВЫЙ,** -ая, -ое илтифатлы, әҙәпле, ихтирамлы; **учти́вый челове́к** илтифатлы кеше

**УЧУ́ЯТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** һиҙеү, һиҙеп ҡалыу (алыу); **соба́ка учу́яла зве́ря** эт йыртҡысты һиҙеп алды **2.** *перен.* (*почувствовать*) һиҙеү, тойоу, тойоп ҡалыу (алыу); **учу́ять се́рдцем** йөрәк менән тойоу, күңел һиҙеү

**УША́Н** *м* оҙон ҡолаҡлы ярғанат

**УША́НКА** *ж*; *разг.* ҡолаҡсын, ҡолаҡлы бүрек

**УША́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** ҙур (оло, оҙон) ҡолаҡлы; **уша́стые тюле́ни** ҙур ҡолаҡлы тюлендәр **2.** *перен.* оҙон ҡолаҡ (*күпте ишетеп-белеп һөйләп йөрөгән кешегә ҡарата*)

**УША́Т** *м* ҡолаҡлы күнәк, ҡулдыҡай

**У́ШИ** *мн. см.* **у́хо**

**УШИ́Б** *м* **1.** *см.* **ушиби́ть — ушиба́ть, ушиби́ться — ушиба́ться 2.** (*место*) бәрелгән (күгәргән, имгәнгән) урын

**УШИБА́ТЬ** *несов. см.* **ушиби́ть**

**УШИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ушиби́ться 2.** *страд. от* **ушиба́ть**

**УШИБИ́ТЬ** *сов. кого-что* бәреп (һуғып) ауырттырыу, бәреп (һуғып) имгәтеү, күгәртеү; **ушиби́ть ру́ку** ҡулды бәреп имгәтеү

**УШИБИ́ТЬСЯ** *сов.* бәрелеп ауыртыныу (имгәнеү)

**УШИВА́ТЬ** *несов. см.* **уши́ть**

**УШИ́ТЬ** *сов.* **1.** (тегеп) тарайтыу; **уши́ть пла́тье** күлдәкте тарайтыу **2.** (*расшить*) теҙеп тегеп сығыу, тотоп сығыу, сигеп сығыу; **уши́ть по́яс би́сером** билбауға сәйлән теҙеп тегеп сығыу **3.** (*зашить кругом*) тегеп бөтөрөү, сырмап тегеп сығыу; **уши́ть тюк** ҙур төргәкте сырмап тегеп сығыу

**У́ШКО** и **УШКО́** *с* **1.** *уменьш.-ласк. от* **у́хо** 1; **2.** элмәк, ҡолаҡ; **ушко́ сапога́** итек ҡолағы **3.** (*в игле*) күҙ, энә күҙе **4.** *обычно мн.* **ушки́** (*род пельменей и макаронных изделий*) ваҡ билмән, сумар һымаҡ макарон ♦ **у́шки на маку́шке** *см.* **маку́шка**

**УШКУ́Й** *м* ушкуй (*ялпаҡ төплө боронғо ҙур кәмә*)

**У́ШЛЫЙ,** -ая, -ое *прост.* йылғыр, үткер, сая; **у́шлый па́рень** үткер егет

**УШНИ́К** *м*; *разг.* ҡолаҡ табибы

**УШНО́Й,** -ая, -ое ҡолаҡ ...ы; **ушна́я ра́ковина** ҡолаҡ япрағы (кимерсәге); **ушна́я боль** ҡолаҡ ауыртыуы (һыҙлауы)

**УЩЕ́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое тарлауыҡлы; **уще́листые го́ры** тарлауыҡлы тауҙар

**УЩЕ́ЛЬЕ** *с* тарлауыҡ

**УЩЕМИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡыҫыу, ҡыҫтырыу; **ущеми́ть ру́ку две́рью** ҡулды ишеккә ҡыҫтырыу **2.** *кого-что*; *перен.* (*стеснить*) ҡыҫыу, сикләү; **ущеми́ть права́ челове́ка** кеше хоҡуҡтарын ҡыҫыу **3.** *кого-что*; *перен.* (*причинить обиду*) кәмһетеү, мыҫҡыл итеү, тейеү, хурлау; **ущеми́ть досто́инство челове́ка** кешенең намыҫына тейеү

**УЩЕМИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡыҫылыу, ҡыҫтырылыу

**УЩЕМЛЕ́НИЕ** *с см.* **ущеми́ть — ущемля́ть**

**УЩЕМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **ущеми́ть**

**УЩЕМЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ущеми́ться 2.** *страд. от* **ущемля́ть**

**УЩЕ́РБ** *м* зыян, зарар, ҡаза, юғалтыу; **в уще́рб здоро́вью** сәләмәтлеккә зыян итеп ♦ **на уще́рбе**: 1) (*о луне, месяце*) кәмей башлаған; 2) (*на спаде*) бөтөп бара, һүнеп бара

**УЩЕРБИ́ТЬ** *сов. что* (*нанести ущерб*) зыян (зарар, ҡаза) килтереү

**УЩЕРБИ́ТЬСЯ** *сов.* (*о солнце и луне при затмении*) кәмеү

**УЩЕРБЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **ущерби́ть 2.** *прил.* (*оскорблённый*) рәнйетелгән, кәмһетелгән, мыҫҡыл ителгән; **ущерблённое самолю́бие** кәмһетелгән намыҫ

**УЩЕ́РБНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о луне, месяце*) кәмей башлаған **2.** *перен.* һүнә башлаған; **уще́рбная красота́** һүнә башлаған матурлыҡ **3.** (*ненормальный*) кәмселекле, нормаль булмаған; **уще́рбное разви́тие** кәмселекле үҫеш

**УЩИПНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** семтеп (бороп) алыу; **ущипну́ть за́ руку** ҡулды семтеп алыу **2.** *перен., разг.* әрнетеү, сәнсеп алыу; **его́ отве́т бо́льно ущипну́л за се́рдце** уның яуабы йөрәкте әрнетеп ҡуйҙы **3.** *разг.* (*отщипнуть*) семтеп (өҙөп, ялмап) ҡабыу; **ло́шадь ущипну́ла траву́** ат үлән ялмап ҡапты

**УЩУ́ПАТЬ** *сов. что*; *прост.* ҡапшап (һәрмәп) ҡарау

**УЮ́Т** *м* йәм, ҡот, күркәмлек; **созда́ть ую́т в до́ме** өйҙә йәм булдырыу

**УЮ́ТНЫЙ,** -ая, -ое йәмле, ҡотло, күңелгә ятышлы, күркәм; **ую́тная ко́мната** йәмле бүлмә

**УЯЗВИ́МОСТЬ** *ж* йомшаҡлыҡ, күңел нескәлеге

**УЯЗВИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неспособный выдержать удар*) йомшаҡ, ныҡлы булмаған; **уязви́мое ме́сто проти́вника** дошмандың йомшаҡ урыны **2.** *перен.* (*такой, которого легко обидеть*) тиҙ рәнйей торған, күңеле кителә торған, хәтере ҡала торған

**УЯЗВИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *уст.* (*нанести рану кому-л.*) яралау, йәрәхәтләү **2.** *перен.* (*обидеть*) кәмһетеү, рәнйетеү, хәтерен ҡалдырыу

**УЯЗВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **уязви́ть**

**УЯСНЕ́НИЕ** *с см.* **уясни́ть — уясня́ть**

**УЯСНИ́ТЬ** *сов. что* асыҡлау, аныҡлау; **уясни́ть суть де́ла** эштең асылын асыҡлау

**УЯСНИ́ТЬСЯ** *сов.* асыҡланыу, аныҡланыу

**УЯСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **уясни́ть**

**УЯСНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **уясни́ться 2.** *страд. от* **уясня́ть**



19 зак. 2.0007.06

# Ф

**ФА** *с нескл.*; *муз.* фа (*гамманың дүртенсе нотаһы*)

**ФА́БРИКА** *ж* фабрика; **конди́терская фа́брика** кондитер фабрикаһы; **обувна́я фа́брика** аяҡ кейеме фабрикаһы; **тка́цкая фа́брика** туҡыу фабрикаһы

**ФА́БРИКА-КУ́ХНЯ** *ж* фабрика-кухня (*механикалаштырылған дөйөм туҡланыу предприятиеһы*)

**ФАБРИКА́НТ** *м* фабрикант (*фабрика хужаһы*)

**ФАБРИКА́Т** *м* фабрикат (*фабрикала эшләп сығарылған әҙер изделие, продукт*); **бума́жный фабрика́т** ҡағыҙ фабрикаты

**ФАБРИКА́ЦИЯ** *ж см.* **фабрикова́ть**

**ФАБРИКОВА́ТЬ** *несов. что* **1.** *уст.* (фабрикала) эшләп сығарыу (яһау); **фабрикова́ть посу́ду** һауыт-һаба эшләп сығарыу **2.** *разг., ирон.* күпләп яһау (эшләү, яҙыу һ.б.), этмәләү; **фабрикова́ть фи́льмы** фильмдар этмәләү **3.** *перен.* ялған таратыу, уйҙырма (уйлап) сығарыу; **фабрикова́ть слу́хи** ялған хәбәрҙәр таратыу

**ФАБРИ́ЧНО-ЗАВОДСКО́Й,** -ая, -ое фабрика-завод ...ы; **фабри́чно-заводско́е обуче́ние** фабрика-завод эшенә өйрәтеү

**ФАБРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** фабрика ...ы; **фабри́чное клеймо́** фабрика келәймәһе; **фабри́чная конто́ра** фабрика конторалы **2.** фабрикала эшләнгән (яһалған); **фабри́чный ковёр** фабрикала эшләнгән келәм **3.** фабрикалы, сәнәғәтле; **фабри́чный го́род** фабрикалы ҡала

**ФА́БУЛА** *ж*; *лит.* фабула (*әҙәби әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың эҙмә-эҙлелеге*); **интере́сная фа́була** ҡыҙыҡлы фабула

**ФА́БУЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *лит.* фабула ...ы, фабулалағы, фабуланың; **фа́бульные совпаде́ния** фабулалағы тап килеүҙәр

**ФАВОРИ́Т** *м* **1.** фаворит (*юғары дәрәжәле кешенең яратҡан һәм һәр ваҡыт яҡлай торған кешеһе; күпселек көйәрмәндәрҙең уйынса бәйгелә алға сығыуы көтөлгән ат*) **2.** һөйәр (*юғары ҡатлам ҡатын-ҡыҙҙарының*) **3.** (*любимец*) һөйгән (яратҡан) кеше

**...ФА́Г** *м* (*ҡушма һүҙҙәрҙең "ашаусы", "йотоусы", "бөтөрөүсе" мәғәнәләрен аңлатҡан икенсе өлөшө*); **бактериофа́г** бактериофаг

**ФАГО́Т** *м*; *муз.* фагот (*тынлы музыка ҡоралы*)

**ФАГОТИ́СТ** *м* фаготсы (*фаготта уйнаусы*)

**ФАГОЦИТО́З** *м*; *биол.* фагоцитоз (*фагоциттарҙың ят есемдәрҙе һәм бактерияларҙы йотоуы*)

**ФАГОЦИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **фагоци́т** *м*); *биол.* фагоциттар (*организмға эләккән ят есемдәрҙе һәм бактерияларҙы йотоусы күҙәнәктәр*)

**ФА́ЗА** *ж*; *в разн. знач.* фаза; **после́дняя фа́за разви́тия** үҫештең һуңғы фазаһы; **пе́рвая фа́за туберкулёза лёгких** үпкә туберкулёзының беренсе фазаһы; **фа́за спе́лости зерна́** орлоҡтоң өлгөрөү фазаһы; **фа́за колеба́ния ма́ятника** маятник тирбәлеше фазаһы; **фа́за Мерку́рия** Меркурий фазаһы; **жи́дкая фа́за** шыйыҡ фаза; **твёрдая фа́за** ҡаты фаза; **фа́за минерализа́ции** минераллашыу фазаһы

**ФАЗА́Н** *м* фазан, ҡырғауыл

**ФАЗА́НИЙ,** -ья, -ье, фазан(дар) ...ы, ҡырғауыл ...ы; **фаза́нье перо́** ҡырғауыл ҡауырһыны; **фаза́нье мя́со** фазан ите

**ФАЗА́НОВЫЕ** *мн.*; *зоол.* фазандар ғаиләһе (*бүҙәнә, мысыр тауығы, тауис һ.б.*)

**ФА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *эл.* фаза ...ы, фазалы; **фа́зный про́вод** фазалы сым

**...ФА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "фазалы" мәғәнәһен аңлатҡан икенсе өлөшө, мәҫ.,* **трёхфа́зный** өс фазалы

**ФАЗО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "фаза" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **фазокомпенса́тор** фазокомпенсатор

**ФА́ЗОВЫЙ,** -ая, -ое *спец.* фаза ...ы, фазалы; **фа́зовое напряже́ние** фаза көсөргәнеше

**ФАЗО́МЕТР** *м*; *эл.* фазометр, фаза үлсәүес

**ФАЗОТРО́Н** *м*; *физ.* фазотрон (*зарядлы өлөшсәләрҙең хәрәкәтен тиҙләтеү ҡулайламаһы*)

**ФАЗОУКАЗА́ТЕЛЬ** *м*; *физ.* фаза күрһәткес

**ФАЙ** *м* фай (*арҡыры һыҙатлы ебәк йәки йөн туҡыма*)

**ФАЙДЕШИ́Н** *м* файдешин (*ебәк туҡыма, фай төрө*)

**ФАЙДЕШИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое файдешин; **файдеши́новое пла́тье** файдешин күлдәк

**ФА́КЕЛ** *м* **1.** факел, сыраҡ; **заже́чь фа́кел** сыраҡ яндырыу **2.** ялҡын бағанаһы; **фа́кел га́за** газ ялҡыны бағанаһы

**ФА́КЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое факел ...ы, сыраҡ ...ы **фа́кельное пла́мя** сыраҡ ялҡыны; **фа́кельное ше́ствие** факелдәр менән тантаналы йөрөш

**ФА́КЕЛЬЩИК** *м* факелсы (**1.** *сыраҡ тотоп барыусы* **2.** *ут тоҡандырыусы*); **кома́нда фа́кельщиков** факелсылар командаһы

**ФАКИ́Р** *м* **1.** (*мусульманский аскет*) дәрүиш **2.** (*фокусник*) фокуссы (*фокус күрһәтеүсе*)

**ФАКСИ́МИЛЕ 1.** *с нескл.* факсимиле (*ҡульяҙманың, документтың һ.б. үҙгәртелмәйенсә төшөрөп алынған күсермәһе*) **2.** *в знач. неизм. прил.* факсимиле, үҙгәртмәй төшөрөлгән (баҫылған); **ру́копись факси́миле** үҙгәртмәй баҫылған ҡульяҙма **3.** *нареч.* факсимиле, үҙгәртмәй, үҙгәртмәйенсә; **ру́копись и́здана факси́миле** ҡульяҙма үҙгәртмәй төшөрөп баҫылған

**ФАКТ** *м* **1.** факт, булған эш-хәл, ысын ваҡиға; **истори́ческий факт** тарихи факт; **приводи́ть фа́кты** факттар килтереү; **отража́ть фа́кты** факттарҙы сағылдырыу **2.** *обычно в знач. сказ.* (*реальность, действительность*) факт, ысынбарлыҡ, ысынлыҡ; **он бо́лен, э́то — факт** ул ауырый, был — факт **3.** (*истинное явление, событие*) факт, миҫал, осраҡ; **факт существова́ния письма́** хат булыу факты **4.** *в знач. утверд. частицы*; *прост.* (*верно, несомненно*) факт, хәҡиҡәт

**ФАКТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое фактик, факттарға нигеҙләнгән, ысын; **факти́ческий материа́л** фактик материал; **факти́ческое положе́ние де́ла** эштең ысын торошо

**ФАКТОГРА́ФИЯ** *ж* факттарҙы тасуирлау (*анализһыҙ ғына*)

**ФА́КТОР** *м* фактор, шарт (*берәй ваҡиғаны, күренеште, хәлде тыуҙырыусы сәбәп*); **фа́ктор вре́мени** ваҡыт факторы; **климати́ческие фа́кторы** климат факторҙары; **постоя́нно де́йствующие фа́кторы** даими тәьҫир итеүсе факторҙар; **фа́кторы ро́ста** үҫеү шарттары

**ФАКТУ́РА** *ж* фактура (**1.** *махс. сәнғәт әҫәрҙәре техникаһының үҙенсәлеге* **2.** *махс. туҡыма, бүяла һ.б. тышҡы күренешен билдәләй торған эшкәртеү ысулы* **3.** *сауҙа. оҙатылған тауарҙарҙың исемдәре яҙылған иҫәп ҡағыҙы*)

**ФАКТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** фактуралы; **факту́рный приём** фактуралы алым **2.** *торг.* фактура(лар) …ы; **факту́рная за́пись** фактура яҙыуы; **факту́рная кни́га** фактура кенәгәһе

**ФАКУЛЬТАТИ́В** *м*; *разг.* факультатив (*үҙ теләге, ихтыяры менән өйрәнелә торған фән йәки курс*); **вести́ факультати́в** факультатив алып барыу

**ФАКУЛЬТАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое факультатив, ихтыяри; **факультати́вный спецку́рс** факультатив махсус курс

**ФАКУЛЬТЕ́Т** *м* факультет; **истори́ческий факульте́т** тарих факультеты; **дека́н факульте́та** факультет деканы

**ФАКУЛЬТЕ́ТСКИЙ,** -ая, -ое факультет …ы; **факульте́тское собра́ние** факультет йыйылышы

**ФАЛ** *м* **1.** *мор.* фал, бау, арҡан (*парус һ.б. күтәреү өсөн*) **2.** *ав.* парашют бауы

**ФАЛА́НГА** *ж* **1.** *ист.* фаланга (*боронғо гректарҙа ғәскәрҙең сафҡа теҙелеү тәртибе*) **2.** (*ряд, шеренга*) тигеҙ рәт, саф **3.** *анат.* быуын һөйәге (*бармаҡтағы*) **4.** *зоол.* фаланга (*ағыулы йәнлек*)

**ФА́ЛДА** *ж* фалда (**1.** *ирҙәр кейемендәге артҡы сабыу* **2.** *кейемдең, пәрҙәнең һ.б. буйға йыйырылып тегелгән бөрмәһе*)

**ФАЛЬСИФИКА́ТОР** *м* фальсификатор, боҙоп күрһәтеүсе; **фальсифика́торы исто́рии** тарихты боҙоп күрһәтеүселәр

**ФАЛЬСИФИКА́ЦИЯ** *ж* **1.** (*подмена подлинного ложным*) фальсификациялау, ялғанлап күрһәтеү, боҙоп күрһәтеү; **фальсифика́ция истори́ческих фа́ктов** тарихи факттарҙы боҙоп күрһәтеү; **фальсифика́ция нау́чных да́нных** фәнни мәғлүмәттәрҙе боҙоп күрһәтеү **2.** (*подделывание чего-л.*) фальсификациялау, боҙоп яһау (эшләү); **фальсифика́ция докуме́нтов** документтар боҙоп яһау **3.** (*подделанная вещь*) яһалма әйбер, ялған нәмә

**ФАЛЬСИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* фальсификациялау, боҙоп күрһәтеү; **фальсифици́ровать протоко́лы заседа́ний** ултырыш протоколдарын боҙоп күрһәтеү

**ФАЛЬСТА́РТ** *м*; *спорт.* фальстарт, яңылыш старт (*ваҡытынан алда башланған старт*)

**ФАЛЬЦ** *м*; *спец.* **1.** (*шов*) йөй, ырмау **2.** (*паз*) уйым **3.** (*сгиб печатного листа*) бөгөм, бөкләнеү урыны

**ФАЛЬЦЕВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* фальцовкалау …ы; **фальцева́льная маши́на** фальцовкалау машинаһы

**ФАЛЬЦЕВА́НИЕ** *с*; *спец. см.* **фальцева́ть**; **фальцева́ние листо́в** ҡағыҙ биттәрен бөкләү

**ФАЛЬЦЕВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* **1.** фальцовкалау, фальц яһау, бөгөү, ырмау алыу; **фальцева́ть жесть** ҡалай бөгөү **2.** бөкләү; **фальцева́ть газе́ты** гәзиттәрҙе бөкләү

**ФАЛЬЦЕ́Т** *м* фальцет (**1.** *бик юғары тауыш сығарыу һәм шундай тауыш менән йырлау* **2.** *ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына оҡшаған нәҙек тауыш*)

**ФАЛЬЦО́ВКА** *ж*; *спец. см.* **фальцева́ть**

**ФАЛЬЦО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* фальцевать итә торған, бөгә торған; **фальцо́вочная маши́на** фальцевать итә торған машина

**ФАЛЬЦО́ВЩИК** *м* и **ФАЛЬЦО́ВЩИЦА** *ж* фальцовкалаусы

**ФАЛЬШИ́ВИТЬ** *несов.* **1.** ике йөҙләнеү, ялғанлау, хәйләләү **2.** *муз.* көйҙө боҙоу (боҙоп йырлау), боҙоп уйнау; **пиани́ст фальши́вит** пианист көйҙө боҙоп уйнай

**ФАЛЬШИ́ВКА** *ж*; *разг.* ялған (алдыҡ) документ

**ФАЛЬШИВОМОНЕ́ТЧИК** *м* ялған аҡса яһаусы (һуғыусы)

**ФАЛЬШИ́ВОСТЬ** *ж* **1.** (*притворство, лицемерие*) яһалмалылыҡ, ялғанлыҡ, ике йөҙлөлөк; **фальши́вость го́лоса** тауыштың яһалмалылығы **2.** яңылышлыҡ (*йырҙа, музыка уйнағанда*)

**ФАЛЬШИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*поддельный*) ялған, яһалма, алдыҡ; **фальши́вые докуме́нты** ялған документтар; **фальши́вый же́мчуг** яһалма ынйы **2.** (*притворный, лицемерный*) эскерле, монафиҡ, ике йөҙлө, яһалма, алдыҡ, ялған; **фальши́вый взгляд** яһалма ҡараш; **фальши́вая доброта́** ялған мәрхәмәтлелек; **фальши́вая улы́бка** яһалма йылмайыу **3.** (*неестественный*) яһалма (*тәбиғи булмаған*); **находи́ться в фальши́вом положе́нии** яһалма хәлдә булыу **4.** *муз.* (*искажающий мелодию*) яңылыш, хата, боҙоҡ; **фальши́вая но́та** яңылыш нота

**ФАЛЬШЬ** *ж* **1.** (*обман*) алдыҡ, алдашыу, ялған; **фальшь в ка́рточной игре́** кәрт уйынындағы алдашыу **2.** (*неискренность*) эскерлелек, ике йөҙлөлөк, монафиҡлыҡ; **заме́тить фальшь** ике йөҙлөлөктө белеп ҡалыу **3.** (*отсутствие естественности*) яһалмалылыҡ, тәбиғи булмау **4.** *муз.* (*искажённость мелодии, ритма*) яңылышлыҡ, хата; **фальшь в исполне́нии фу́ги** фуга башҡарыуҙағы яңылышлыҡ

**ФАМИ́ЛИЯ** *ж* **1.** фамилия; **назва́ть фами́лию** фамилияны әйтеү; **меня́ть фами́лию** фамилияны алмаштырыу **2.** (*род*) ырыу, тоҡом, нәҫел; **дре́вняя кня́жеская фами́лия** боронғо кенәз нәҫеле **3.** *разг.* (*семья*) ғаилә, ғаилә ағзаһы; **фотогра́фии на́шей фами́лии** беҙҙең ғаиләнең фотографиялары

**ФАМИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ырыу ...ы, нәҫел ...ы, ғаилә ...ы; **фами́льный архи́в** нәҫел архивы **2.** (*семейный, передающийся по наследству*) нәҫелдән бирелгән, нәҫелдән килгән, мираҫ булып ҡалған, ғаилә ...ы; **фами́льное схо́дство** нәҫелдән килгән оҡшашлыҡ; **фами́льные драгоце́нности** мираҫ булып ҡалған ҡиммәтле әйберҙәр

**ФАМИЛЬЯ́РНИЧАТЬ** *несов. с кем* и *без доп.* артыҡ иркен ҡыланыу, тартынмау, тыйнаҡһыҙланыу, әҙәпһеҙләнеү

**ФАМИЛЬЯ́РНОСТЬ** *ж* артыҡ иркенлек, тартынмау, тыйнаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, әрһеҙлек; **допусти́ть фамилья́рность** әҙәпһеҙлеккә юл ҡуйыу

**ФАМИЛЬЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое артыҡ иркен, тартыныуһыҙ, тыйнаҡһыҙ, әҙәпһеҙ; **фамилья́рное обраще́ние** әҙәпһеҙ өндәшеү

**ФАНАБЕ́РИЯ** *ж*; *разг.*, *пренебр.* һауалылыҡ, эрелек, тәкәбберлек, мин-минлек, маһайыусанлыҡ, ҡупырлыҡ; **набра́ться фанабе́рии** тәкәбберлеккә өйрәнеү

**ФАНАТИ́ЗМ** *м* фанатизм; **проявле́ние фанати́зма** фанатизмдың сағылыуы

**ФАНА́ТИК** *м* и **ФАНАТИ́ЧКА** *ж* фанатик (**1.** *дингә ныҡ бирелгән кеше* **2.** *берәй идеяға, эшкә ныҡ бирелгән кеше*)

**ФАНАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое фанатиктарса, фанатик; **фанати́ческая пре́данность** фанатиктарса тоғролоҡ һаҡлау

**ФАНАТИ́ЧНОСТЬ** *ж* фанатиклыҡ; **фанати́чность убежде́ний** ышаныстың (инаныуҙың) фанатиклығы

**ФАНАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үтә диндар, фанатик; **фанати́чный челове́к** фанатик кеше **2.** *см.* **фанати́ческий**

**ФАНЕ́РА** *ж* фанер, кибәҙә; **пятисло́йная фане́ра** биш ҡатлы фанер

**ФАНЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** фанер ...ы; **фане́рный комбина́т** фанер комбинаты **2.** (*сделанный из фанеры*) фанер; **фане́рный я́щик** фанер йәшник

**ФАНЕРОВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* фанерлау, фанер менән көпләү (ҡаплау); **фанерова́ть шкаф** шкафты фанер менән көпләү

**ФАНЕРО́ВКА** *ж*; *спец. см.* **фанерова́ть**

**ФА́НЗА** *ж* фанза (*Ҡытайҙа, Кореяла ауыл өйө*)

**ФАНТ** *м* фант (*уйында отолған кешенән алған нәмә һәм уны ҡайтарып алыу ҡағиҙәһе*); **исполня́ть фант** фант үтәү

**ФАНТАЗЁР** *м* и **ФАНТАЗЁРКА** *ж* хыялый, хыялға бирелеүсе, фантазёр

**ФАНТАЗИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** (*мечтать*) хыялланыу, хыялға бирелеү; **люби́ть фантази́ровать** хыялға бирелергә яратыу **2.** (*выдумывать*) уйлап сығарыу (табыу) **3.** (*импровизировать*) импровизациялау

**ФОРМА́ТНЫЙ,** -ая, -ое формат ...ы, форматлы; **форма́тный станда́рт** форматлы стандарт

**ФОРМА́ЦИЯ** *ж* формация (**1.** *кит. үҫештәге билдәле бер баҫҡыс, дәүер, осор* **2.** *геол. билдәле бер дәүер эсендә барлыҡҡа килгән ер ҡатламдары*)

**ФО́РМЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*сделанный по форме*) форма ...ы, формалы; **фо́рменное пла́тье** форма күлдәге **2.** (*составленный по форме*) өлгө ...ы; **фо́рменный протоко́л** өлгө протоколы **3.** *разг.* (*самый настоящий*) ысын; **фо́рменный бой** ысын һуғыш; **фо́рменный плут** ысын алдаҡсы

**ФОРМИРОВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **формирова́ть, формирова́ться 2.** (*воинское соединение*) формирование

**ФОРМИРОВА́ТЬ** *несов. что* **1.** формалаштырыу, рәүешкә килтереү, рәүеш биреү; **формирова́ть кро́ны дере́вьев** ағас олонон формалаштырыу **2.** *перен.* (*воспитывать определённые качества*) тәрбиәләү, тыуҙырыу; **формирова́ть челове́ка** кеше тәрбиәләү **3.** (*организовывать*) төҙөү, ойоштороу, булдырыу; **формирова́ть о́перную тру́ппу** опера труппаһы ойоштороу; **формирова́ть прави́тельство** хөкүмәт төҙөү; **формирова́ть железнодоро́жный соста́в** тимер юл составын төҙөү

**ФОРМИРОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*приобретать какую-л. форму*) формалашыу **2.** (*физически развиваться, приобретать зрелость форм*) үҫеп етеү, етлегеү, формалашыу; **нача́ть формирова́ться** формалаша башлау **3.** (*организовываться*) ойошоу, төҙөлөү; **полк на́чал формирова́ться** полк төҙөлә башланы **4.** *страд. от* **формирова́ть**

**ФОРМОВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* **1.** ҡалыпҡа һалыу (һуғыу), формаға һалыу, формалау, формовкалау; **формова́ть дета́ли** деталдәрҙе ҡалыпҡа һалыу **2.** (*изготовлять форму для отливки*) ҡалып яһау, форма әҙерләү

**ФОРМОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *спец.* ҡалыпҡа һалыныу, ҡалыпланыу, формаланыу, формовкаланыу **2.** *страд. от* **формова́ть**

**ФОРМО́ВКА** *ж* **1.** *спец. см.* **формова́ть 2.** формовка, ҡалып

**ФОРМОВО́Й,** -ая, -ое **1.** *спец.* (*пригодный для выделки изделий в формах*) форма ...ы, форма (ҡалып) яһай торған; **формова́я гли́на** форма яһай торған балсыҡ **2.** формалы, формала (эшләнгән һ.б.); **формово́й хлеб** формала бешерелгән икмәк

**ФОРМО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **формово́й** 1; **2.** (*предназначенный для формовки*) форма ...ы, форма эшләү; **формо́вочный автома́т** форма эшләү автоматы

**ФОРМО́ВЩИК** *м* и **ФОРМО́ВЩИЦА** *ж* ҡалыпҡа һалыусы, форма яһаусы

**ФО́РМУЛА** *ж*; *в разн. знач.* формула; **о́бщая фо́рмула** дөйөм формула; **математи́ческая фо́рмула** математик формула

**ФОРМУЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* әйтеп биреү, аныҡ итеп әйтеү; **формули́ровать свои́ предложе́ния** үҙ тәҡдимдәреңде аныҡ итеп әйтеү

**ФОРМУЛИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **формули́ровать 2.** (*сформулированная мысль*) билдәләмә, аныҡланған фекер; **но́вая формулиро́вка** яңы билдәләмә

**ФОРМУЛЯ́Р** *м* формуляр (**1.** *революцияға тиклем Рәсәйҙә кешенең хеҙмәт кенәгәһе* **2.** *махс. төҙөлөштә, механизмдарҙа һ.б. төп мәғлүмәттәр теркәлеп барған айырым китап йәки бланк* **3.** *китапханаларҙағы китаптарҙың, улар менән файҙаланыусыларҙың иҫәп карточкаһы*)

**ФОРПО́СТ** *м* **1.** *воен.* форпост **2.** *перен., книжн.* форпост, төп терәк; **форпо́ст нау́ки** фәндең төп терәге

**ФОРС** *м*; *прост.* һауалылыҡ, тәкәбберлек, эрелек ♦ **сбить форс** кикреген төшөрөү

**ФОРСИ́РОВАНИЕ** *с см.* **форси́ровать**

**ФОРСИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **форси́ровать 2.** *прил.* көсәйтелгән, тиҙләтелгән; **форси́рованные те́мпы** тиҙләтелгән темп

**ФОРСИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** көсәйтеү, тиҙләтеү, ашыҡтырыу; **форси́ровать строи́тельство** төҙөлөштө тиҙләтеү **2.** *муз.* тауышты күтәреү (көсәйтеү) **3.** *тех.* арттырыу, күбәйтеү **4.** *воен.* (*преодолеть с боем*) (һуғышып) кисеү (аша сығыу, үтеү, алыу); **форси́ровать ре́ку** йылғаны һуғышып аша сығыу

**ФОРСИ́ТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** (*щеголять*) ҡупшыланыу, көйәҙләнеү **2.** (*хвастаться, важничать*) маҡтаныу, кәпәренеү, маһайыу

**ФОРСУ́НКА** *ж* форсунка (*шыйыҡлыҡты йәки онтаҡ материалды бөркөү йайланмаһы*); **механи́ческая форсу́нка** механик форсунка; **штифто́вая форсу́нка** штифтлы форсунка

**ФОРТ** *м* форт (*кәлғә ҡоролмаһындағы айырым нығытма*)

**ФО́РТЕ** *муз.* **1.** *нареч.* форте (*көслө тауыш менән, бар тауышҡа*) **2.** *с нескл.* форте (*бар тауышҡа*)

**ФОРТЕПЬЯ́ННЫЙ** и **ФОРТЕПИА́ННЫЙ,** -ая, -ое фортепьяно ...ы, фортепиано ...ы, фортепьяно (фортепиано) өсөн яҙылған; **фортепья́нные кла́виши** фортепьяно телдәре (баҫмаҡтары); **фортепиа́нный конце́рт** фортепиано өсөн яҙылған концерт

**ФОРТЕПЬЯ́НО** и **ФОРТЕПИА́НО** *с нескл.* фортепьяно, фортепиано; **игра́ть на фортепья́но** фортепьянола уйнау

**ФОРТИ́ССИМО** *муз.* **1.** *нареч.* фортиссимо (*артыҡ көслө тауыш менән*) **2.** *с нескл.* фортиссимо (*көслө тауыш менән уйналған урын*)

**ФОРТИФИКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *воен.* фортификация ...ы; **фортификацио́нные рабо́ты** фортификация эштәре; **фортификацио́нные сооруже́ния** фортификация ҡоролмалары

**ФОРТИФИКА́ЦИЯ** *ж*; *воен.* фортификация (**1.** *һуғыш майҙанын нығытыу тураһындағы хәрби-инженерлыҡ фәне* **2.** *хәрби-инженерлыҡ ҡоролмалары*)

**ФО́РТОЧКА** *ж* форточка; **закры́ть фо́рточку** форточканы ябыу

**ФОРТУ́НА** *ж*; *книжн.* яҙмыш, бәхетле осраҡ, бәхет; **форту́на улыбну́лась** бәхет йылмайҙы

**ФО́РУМ** *м* форум (1. *тар. Боронғо Римда ҡаланың ижтимағи тормош үҙәге булып хеҙмәт иткән майҙан* 2. *киң вәкилле йыйылыш*); **междунаро́дный фо́рум враче́й** табиптарҙың халыҡ-ара форумы

**ФОСГЕ́Н** *м*; *хим.* фосген (*сәнәғәттә иреткестәр, буяғыстар һәм фармацевт препараттары алыуҙа ҡулланылған төҫһөҙ һаҫыҡ газ*; *Беренсе донъя һуғышында тонсоҡторғос газ булараҡ ҡулланылған*)

**ФОСГЕ́НОВЫЙ,** -ая, -ое фосген ...ы; **фосге́новый за́пах** фосген еҫе

**ФОСФА́Т** *м*; *хим.* фосфат (*фосфор кислотаһы тоҙо*)

**ФОСФА́ТНЫЙ,** -ая, -ое фосфат ...ы, фосфатлы; **фосфа́тная соль** фосфат тоҙо; **фосфа́тные шла́ки** фосфатлы шлактар

**ФО́СФОР** *м* фосфор (*химик элемент*); **бе́лый фо́сфор** аҡ фосфор; **кра́сный фо́сфор** ҡыҙыл фосфор

**ФОСФОРЕСЦЕ́НЦИЯ** *ж*; *физ.* фосфоресценция (*ҡайһы бер матдәләрҙең яҡтыртылыуы һәм быҙлап тороуы*)

**ФОСФОРЕСЦИ́РОВАТЬ** *несов.* фосфоресценциялау

**ФО́СФОРИСТЫЙ,** -ая, -ое 1. фосфорлы; **фо́сфористый ангидри́д** фосфорлы ангидрид 2. *см.* **фосфори́ческий**

**ФОСФОРИ́Т** *м* фосфорит (*фосфатлы матдәһе булған ултырмалы тау тоҡомо*)

**ФОСФОРИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое 1. фосфорит ...ы; **фосфори́тный заво́д** фосфорит заводы 2. фосфорит ...ы, фосфориттан эшләнгән; **фосфори́тная мука́** фосфорит оно

**ФОСФОРИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое фосфорит ...ы; **фосфори́товые месторожде́ния** фосфорит ятҡылыҡтары

**ФОСФОРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое быҙлап (һүрән генә) яҡтыртҡан, быҙлап торған; **фосфори́ческое сия́ние** быҙлап торған яҡтылыҡ

**ФО́СФОРНЫЙ,** -ая, -ое 1. фосфор ...ы; **фо́сфорный за́пах** фосфор еҫе 2. (*содержащий фосфор*) фосфорлы; **фо́сфорные удобре́ния** фосфорлы ашламалар 3. *см.* **фосфори́ческий**

**ФОТ** *м*; *физ.* фот (*яҡтылыҡтың яҡтыртылыу дәрәжәһен үлсәү берәмеге*)

**ФО́ТО** *с нескл.*; *разг.* фото

**ФОТО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "фотографик", "фотография" һәм "яҡтылыҡ ярҙамында", "яҡтылыҡ тәьҫирендә башҡарылыу" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **фотоателье́** фотоателье, фотография ательеһы; **фотоуправле́ние** яҡтылыҡ ярҙамында идара итеү

**ФОТОАППАРА́Т** *м* фотоаппарат (*фотография аппараты*)

**ФОТОБУМА́ГА** *ж* фотоҡағыҙ

**ФОТОВЫ́СТАВКА** *ж* фотокүргәҙмә

**ФОТОГАЗЕ́ТА** *ж* фотогәзит

**ФОТОГЕНИ́ЧНОСТЬ** *ж* фотола матур сығыу

**ФОТОГЕНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое фотола матур сыға торған

**ФОТО́ГРАФ** *м* фотограф

**ФОТОГРАФИ́РОВАНИЕ** *с см.* **фотографи́ровать**

**ФОТОГРАФИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* фотоға (фотоһүрәткә, фотокарточкаға) төшөрөү

**ФОТОГРАФИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* 1. фотоға (фотоһүрәткә, фотокарточкаға) төшөү 2. *страд. от* **фотографи́ровать**

**ФОТОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое 1. фотографик, фотография ...ы; **фотографи́ческий аппара́т** фотография аппараты; **фотографи́ческое иску́сство** фотография сәнғәте 2. фотография ...ы, фотоаппарат менән төшөрөлгән; **фотографи́ческий сни́мок** фотоаппарат менән төшөрөлгән һүрәт 3. *перен.* фотографияға төшөрөлгән кеүек, ысынбарлыҡты аныҡ һүрәтләгән; **фотографи́ческая то́чность** фотографияға төшөрөлгән кеүек тура килеү

**ФОТОГРА́ФИЯ** *ж* 1. фотография, фото төшөрөү; **занима́ться фотогра́фией** фото төшөрөү менән шөғөлләнеү 2. фотография, фотоһүрәт, фотокарточка; **увели́ченная фотогра́фия** ҙурайтылған фотоһүрәт 3. (*мастерская*) фотоһүрәт эшләү оҫтаханаһы

**ФОТОКА́РТОЧКА** *ж*; *разг.* фотокарточка, фотоһүрәт

**ФОТОКО́ПИЯ** *ж* фотокопия; **сде́лать фотоко́пию докуме́нта** документтың фотокопияһын эшләү

**ФОТОКОРРЕСПОНДЕ́НТ** *м* фотокорреспондент, фотохәбәрсе; **рабо́тать фотокорреспонде́нтом** фотокорреспондент булып эшләү

**ФОТОЛАБОРАТО́РИЯ** *ж* фотолаборатория

**ФОТОЛИТОГРА́ФИЯ** *ж*; *полигр.* фотолитография (*фотография юлы менән төшөрөп, ташта йәки металл пластинкаға яҡтылыҡҡа һиҙгер ҡатлам һөртөп һүрәтте баҫып сығарыу*)

**ФОТОЛЮБИ́ТЕЛЬ** *м* фотоһәүәҫкәр

**ФОТО́МЕТР** *м* фотометр (*яҡтылыҡ дәүмәлен, көсөн билдәләй торған прибор*)

**ФОТОМОНТА́Ж** *м* фотомонтаж (*берәй тема буйынса тупланған фотографиялар йыйылмаһы*)

**ФОТО́Н** *м*; *физ.* фотон (*электромагнит поленың кванты, яҡтылыҡ өлөшсәһе*)

**ФОТОНАБО́Р** *м*; *полигр.* фотонабор (*баҫма формаларын фотонабор машинаһында диапозитивтар йәки негативтар рәүешендә әҙерләп йыйыу*)

**ФОТОНАБО́РНЫЙ,** -ая, -ое *полигр.* фотонабор ...ы ♦ **фотонабо́рная маши́на** фотонабор машинаһы (*баҫма тексты яҡтылыҡҡа һиҙгер материалда фотография ысулы менән башҡарыла торған йыйыу машинаһы*)

**ФОТООБЪЕКТИ́В** *м* фотообъектив, фотоаппарат объективы

**ФОТООФСЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое *полигр.* фотоофсет ...ы; **фотоофсе́тная печа́ть** фотоофсет баҫмаһы

**ФОТОПЛЁНКА** *ж* фотоплёнка, фототаҫма

**ФОТОРЕПОРТА́Ж** *м* фоторепортаж; **подгото́вить фоторепорта́ж** фоторепортаж әҙерләү

**ФОТОРЕПОРТЁР** *м* фоторепортёр (*фоторепортаждар биреүсе*)

**ФОТОСИ́НТЕЗ** *м*; *бот.* фотосинтез

**ФОТОСНИ́МОК** *м* фотоһүрәт

**ФОТОТЕЛЕГРА́ММА** *ж* фототелеграмма (*фототелеграф буйынса бирелә торған телеграмма*)

**ФОТОТЕЛЕГРА́Ф** *м* фототелеграф (*һүрәт һ.б. радио йәки телеграф аша тапшырыу ҡоролмаһы*)

**ФОТОТЕЛЕГРА́ФНЫЙ,** -ая, -ое фототелеграф ...ы; **фототелегра́фная аппарату́ра** фототелеграф аппаратураһы

**ФОТОТЕРАПИ́Я** *ж*; *мед.* фототерапия (*яҡтылыҡ менән дауалау*)

**ФОТОТЕ́ХНИКА** *ж* фототехника (*фотоһүрәт эшләү техникаһы*)

**ФОТОТИПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *полигр.* фототипия ...ы, фототипик; **фототипи́ческое воспроизведе́ние ру́кописи** ҡулъяҙманы фототипик юл менән тергеҙеү

**ФОТОТИ́ПИЯ** *ж*; *полигр.* фототипия (**1.** *фотография ярҙамында һүрәтте аныҡ итеп баҫып сығарыу ысулы* **2.** *ошо ысул менән алынған һүрәт*)

**ФОТОУВЕЛИЧИ́ТЕЛЬ** *м* фотоҙурайтҡыс

**ФОТОХИ́МИЯ** *ж* фотохимия (*химияның яҡтылыҡ тәьҫирендә булған реакцияларҙы һәм үҙгәрештәрҙе өйрәнә торған бүлеге*)

**ФОТОХРО́НИКА** *ж* фотохроника (*фотографияларҙа сағылыш тапҡан хроника*)

**ФОТОЭЛЕМЕ́НТ** *м*; *спец.* фотоэлемент (*яҡтылыҡ энергияһын электр энергияһына әйерелдерә торған прибор*)

**ФОТОЭТЮ́Д** *м* фотоэтюд (*билдәле бер темаға эшләнгән фотографиялар*)

**ФРАГМЕ́НТ** *м*; *книжн.* фрагмент, киҫәк, өлөш, өҙөк; **фрагме́нт бале́та** балеттың бер өлөшө; **фрагме́нт дре́вней ру́кописи** боронғо ҡулъяҙманың фрагменты

**ФРАГМЕНТА́РНОСТЬ** *ж*; *книжн.* фрагментарлыҡ, тулы булмау

**ФРАГМЕНТА́РНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* **1.** фрагментар (*фрагменттарҙа ғына һаҡланған*) **2.** *перен.* (*отрывочный, неполный*) фрагментар, өҙөк-өҙөк, тулы булмаған; **фрагмента́рное изложе́ние** өҙөк-өҙөк һөйләп биреү

**ФРА́ЗА** *ж* **1.** һөйләм, фраза; **отчётливо вы́говорить ка́ждую фра́зу** һәр фразаны асыҡ итеп әйтеү **2.** (*устойчивый оборот*) һүҙбәйләнеш **3.** (*напыщенное выражение*) ҡабарынҡы һүҙҙәр **4.** *муз.* фраза (*музыкаль теманың ҙур булмаған һәм яҡынса тамамланған өлөшө*)

**ФРАЗЕОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое фразеологик, фразеология ...ы; **фразеологи́ческий слова́рь** фразеологик һүҙлек

**ФРАЗЕОЛО́ГИЯ** *ж* фразеология (**1.** *айырым бер телгә генә хас ҡалыплашҡан тотороҡло һүҙбәйләнештәр* **2.** *тел ғилеменең тотороҡло һүҙбәйләнештәрҙе өйрәнеү бүлеге*)

**ФРАЗЁР** *м* бушбоғаҙ, ҡоро (буш) ҡыуыҡ

**ФРАЗЁРСТВО** *с* бушбоғаҙлыҡ, ҡоро (буш) ҡыуыҡлыҡ

**ФРАЗЁРСТВОВАТЬ** *несов.* буш һүҙ һөйләү, ҡоро ҡыуыҡланыу

**ФРАЗИ́РОВАТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *муз.* асыҡ итеп (баҫым яһап) уйнау (йырлау)

**ФРА́ЗОВЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* фразалағы, фраза ...ы; **фра́зовое ударе́ние** фраза баҫымы

**ФРАК** *м* фрак; **наде́ть фрак** фрак кейеү

**ФРАКЦИОНЕ́Р** *м* фракционер (*фракция ағзаһы*)

**ФРАКЦИО́ННОСТЬ** *ж* фракциясылыҡ, фракциялар булыу

**ФРАКЦИО́ННЫЙ I,** -ая, -ое фракцион, фракция ...ы; **фракцио́нная борьба́** фракцион көрәш

**ФРАКЦИО́ННЫЙ II,** -ая, -ое *спец.* фракция ...ы; **фракцио́нный соста́в** фракция составы

**ФРА́КЦИЯ I** *ж* фракция (**1.** *парламентта, сәйәси ойошмала һ.б. берәй фирҡә ағзаларының берләшкән төркөмө* **2.** *сәйәси фирҡәнең эсендә дөйөм йүнәлеш менән риза булмайынса, айырым төркөмгә берләшкән кешеләр*)

**ФРА́КЦИЯ II** *ж*; *спец.* фракция (*ҡушылмаһан, шыйыҡсанан һ.б. өлөшләп ҡыуыу юлы менән айырып алынған матдә*); **фра́кция не́фти** нефть фракцияһы

**ФРАМУ́ГА** *ж* фрамуга (*ишек, тәҙрәнең юғары асылмаһы*)

**ФРАНК** *м* франк (*Франция, Бельгия, Швейцария, Люксембург аҡса берәмеге*)

**ФРАНКИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* и *без доп.*; *спец.* алдан түләү (түләп ҡуйыу)

**ФРАНТ** *м* и *разг.* **ФРАНТИ́ХА** *ж* франт, ҡупшы (фырт) кеше, көйәҙ кеше, ҡупшыҡай

**ФРАНТИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* ҡупшы (фырт) кейенеп (көйәҙ) йөрөү

**ФРАНТОВСКО́Й,** -ая, -ое *разг.* ҡупшы, көйәҙ; **франтовско́й костю́м** ҡупшы костюм

**ФРАНТОВСТВО́** *с* ҡупшылыҡ, көйәҙлек, франтлыҡ

**ФРАНЦУ́ЗСКИЙ,** -ая, -ое француз ...ы, Франция ...ы; **францу́зский язы́к** француз теле; **францу́зский наро́д** француз халҡы

**ФРАНЦУ́ЗЫ** *мн.* французлар, француз халҡы // *ед.* **францу́з** *м* француз ир-аты; **францу́женка** *ж* француз ҡатын-ҡыҙы

**ФРАХТ** *м*; *мор.*, *торг.* фрахт (**1.** *һыу юлы менән ташыған йөк өсөн түләү* **2.** *судно яллап ташыла торған йөк*)

**ФРАХТОВА́ТЕЛЬ** *м*; *мор.*, *торг.* фрахтлаусы (*йөктәрҙе ташытыу өсөн судно яллаусы*)

**ФРАХТОВА́ТЬ** *несов.* *что*; *мор.*, *торг.* фрахт (килешеү) төҙөү, фрахтлау

**ФРАХТО́ВЩИК** *м*; *мор.*, *торг.* фрахтовщик (*йөк ташырға судно биреп тороусы кеше йәки ойошма*)

**ФРАХТО́ВЫЙ,** -ая, -ое *мор.*, *торг.* фрахт ...ы; **фрахто́вый догово́р** фрахт килешеүе

**ФРЕГА́Т** *м* фрегат (**1.** *өс мачталы елкәнле хәрби карап* **2.** *зоол. диңгеҙ ҡошо*)

**ФРЕЗА́** и *уст.* **ФРЕ́ЗА** *ж* фреза (**1.** *тех. ағастың, металдың өҫтөн ҡырыу, шымартыу өсөн ҡулланылған ҡорал* **2.** *тупраҡ йомшартыусы, торф киҫкеләүсе машина*)

**ФРЕ́ЗЕР** *м см.* **фреза́** 1

**ФРЕ́ЗЕРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** фрезер ...ы, фреза ...ы; **фре́зерные ножи́** фрезер бысаҡтары **2.** фрезерлы, фрезалы; **фре́зерный стано́к** фрезерлы станок **3.** фреза менән сығарылған, фрезалы; **фре́зерный торф** фреза менән сығарылған торф

**ФРЕЗЕРОВА́НИЕ** *с см.* **фрезерова́ть**; **фрезерова́ние по́чвы** тупраҡты фрезалау

**ФРЕЗЕРОВА́ТЬ** *сов.*, *несов.* *что* **1.** *тех.* фрезерлау, фрезалау (*металды, ағасты һ.б. фрезер станогында ҡырып эшкәртеү*); **фрезерова́ть дета́ль** деталде фрезерлау **2.** фрезерлау, фрезалау, фрезер (фреза) менән киҫтереү; **фрезеро́ванный торф** фреза менән киҫтерелгән торф

**ФРЕЗЕРО́ВКА** *ж см.* **фрезерова́ть**

**ФРЕЗЕРО́ВЩИК** *м* и **ФРЕЗЕРО́ВЩИЦА** *ж* фрезеровщик, фрезерсы (*фрезерлы станокта эшләүсе*)

**ФРЕ́ЙЛЕЙН** *ж нескл.* фрейлейн (*Германия һ.б. илдәрҙә кейәүгә сыҡмаған ҡатын-ҡыҙға ҡарата фамилия йәки исем алдынан ҡушып әйтелә*)

**ФРЕ́ЙЛИНА** *ж* фрейлина (*батша, король ҡатындары йә принцесса эргәһендә йөрөгән дворян ҡыҙҙарының дәрәжәһе*)

**ФРЕНО́ЛОГ** *м* френолог (*френология белгесе*)

**ФРЕНОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое френология ...ы, френологик; **френологи́ческая систе́ма** френологик система

**ФРЕНОЛО́ГИЯ** *ж* френология (*кешенең баш һөйәге формаһы менән психик һәм әхлаҡ сифаттарының бәйләнеше тураһындағы теория*)

**ФРЕНЧ** *м* френч (*хәрби куртка*)

**ФРЕ́СКА** *ж* фреска (*әле генә эшләнгән штукатуркаға буяу менән төшөрөлгән һүрәт*)

**ФРЕ́СКОВЫЙ,** -ая, -ое фреска ...ы; **фре́сковая жи́вопись** фреска живописы

**ФРИВО́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** (*непристойность*) әҙәпһеҙлек, килешһеҙлек, еңел аҡыллылыҡ **2.** (*фривольное выражение*) әҙәпһеҙ (килешһеҙ) һүҙ; **говори́ть фриво́льности** килешһеҙ һүҙ һөйләү

**ФРИВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое әҙәпһеҙ, килешһеҙ, еңел аҡыллы; **фриво́льные разгово́ры** әҙәпһеҙ һөйләшеүҙәр

**ФРИКАДЕ́ЛЬКА** *ж* фрикаделька (*үткәрелгән иттән йәки балыҡтан һурпала бешерелгән йоморсалар*)

**ФРИКАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* фрикатив; **фрикати́вные зву́ки** фрикатив өндәр

**ФРО́НДА** *ж* **1.** *ист.* Фронда (*XVII б. Францияла абсолютизмға ҡаршы көрәшкән дворян-буржуаз хәрәкәт*) **2.** *перен.*, *книжн.* фронда (*принципиаль булмаған ҡаршы тороу*)

**ФРОНДЁР** *м* фрондёр (**1.** *тар. Фрондала ҡатнашыусы кеше* **2.** *күсм.*, *кит. ризаһыҙлыҡ күрһәтеүсе кеше*)

**ФРОНДИ́РОВАТЬ** *несов.*; *книжн.* ризаһыҙлыҡ күрһәтеү, килешмәүсәнлек белдереү

**ФРОНТ** *м* **1.** *в разн. знач.* фронт; **наступле́ние по всему́ фро́нту** бөтә фронт буйынса һөжүм итеү; **кома́ндующий фро́нтом** фронт командующийы; **Ю́жный фронт** Көньяҡ фронт; **идеологи́ческий фронт** идеология фронты; **еди́ный фронт сторо́нников ми́ра** тыныслыҡ яҡлаусыларҙың берҙәм фронты; **атмосфе́рный фронт** *метеор.* атмосфера фронты **2.** *спец.* ал(ғы) яҡ (йөҙ); **фронт котла́** ҡаҙандың ал яғы ♦ **на два фро́нта** төрлө йүнәлештә; **широ́ким фро́нтом** *см.* **широ́кий**; **стать (вы́тянуться) во фронт** төҙ баҫып тороу

**ФРОНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* фронталь; **фронта́льная ата́ка** фронталь атака; **фронта́льная турби́нная ка́мера** *спец.* фронталь турбина камераһы; **фронта́льная зо́на** *метеор.* фронталь зона **2.** *перен.* (*производимый одновременно*) фронталь, дөйөм, ғөмүми; **фронта́льная прове́рка** дөйөм тикшереү; **фронта́льный опро́с** фронталь һорап сығыу

**ФРОНТИСПИ́С** *м* фронтиспис (**1.** *архит. бинаның төп фасады* **2.** *полигр. китаптың беренсе бите алдынан йәки берәр биттә текст өҫтөнә урынлаштырылған һүрәт*)

**ФРОНТОВИ́К** *м* фронтовик

**ФРОНТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** фронт ...ы; **фронтова́я полоса́** фронт һыҙығы; **фронтово́й трибуна́л** фронт трибуналы **2.** фронт ...ы, фронттағы; **фронтова́я пи́ща** фронт аҙығы; **фронтовы́е зака́зы** фронт заказдары **3.** фронт ...ы, фронттан ебәрелгән; **фронтово́й приве́т** фронттан ебәрелгән сәләм **4.** *спец.* алғы (йөҙ) яғы; **фронтова́я доска́** таҡтаның алғы яғы

**ФРОНТО́Н** *м*; *архит.* фронтон (*өй ҡыйығының алғы яғындағы өсмөйөш йәки ярым түңәрәк кеҫек көпләмәһе һәм шулай уҡ тәҙрә, ишек башындағы биҙәктәр*); **фронто́н с окно́м** тәҙрәле фронтон

**ФРОНТО́ННЫЙ,** -ая, -ое *архит.* фронтондағы, фронтон ...ы; **фронто́нные украше́ния** фронтондағы биҙәктәр

**ФРУКТ** *м* **1.** емеш, емеш-еләк; **свéжие фрýкты** яңы өлгөргән емеш-еләк **2.** *прост.*, *пренебр.* кеше, сәйер, ғәжәп кеше (әҙәм); **вот так фрукт** бына һиңә кеше

**ФРУКТÓВЫЙ,** -ая, -ое **1.** емеш ...ы, емеш-еләк ...ы; **фруктóвый зáпах** емеш-еләк еҫе; **фруктóвый сад** емеш-еләк баҡсаһы **2.** емеш-еләк ...ы, емеш-еләктән яһалған; **фруктóвый квас** емеш-еләктән яһалған кеүәҫ; **фруктóвый сок** емеш-еләк һуты

**ФРУКТÓЗА** *ж*; *спец.* фруктоза (*емеш шәкәре*)

**ФТИЗИÁТР** *м* фтизиатр (*фтизиатрия белгесе*)

**ФТИЗИАТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое фтизиатрия ...ы; **фтизиатри́ческий кабинéт** фтизиатрия кабинеты

**ФТИЗИАТРИ́Я** *ж* фтизиатрия (*медицинаның ҡупкә туберкулёзын һәм уны дауалау ысулдарын өйрәнә торған бүлеге*)

**ФТОР** *м* фтор (*химик элемент, ҡырҡыу еҫле аҡһыл һары газ*)

**ФТÓРИСТЫЙ,** -ая, -ое фторлы; **фтóристый азóт** фторлы азот

**ФУ** *межд.* уф, фу; **фу, как он надоéл** уф, ул ныҡ ялҡытты ♦ **фý-ты**; **фý-ты нý-ты** уф шуны, фу шаҡшыны (*аптырауҙы, асыу килеүҙе белдергәндә ҡулланыла*)

**ФÝГА** *ж*; *муз.* фуга (**1.** *бер үк музыкаль теманы төрлө тауыштар менән эҙмә-эҙлекле ҡабатлау* **2.** *шундай ҡабатлауға ҡоролған музыкаль әҫәр*)

**ФУГÁНОК** *м* фуган (*оҙон йышҡы*)

**ФУГÁС** *м* фугас (*ергә күмелә йәки артыҡ тәрән булмаған һыуға төшөрөлә торған шартлатҡыс матдәнең заряды*)

**ФУГÁСКА** *ж*; *разг.* фугас (**1.** *фугаслы авиабомба* **2.** *фугаслы снаряд*)

**ФУГÁСНЫЙ,** -ая, -ое фугас ...ы, фугаслы; **фугáсный снаря́д** фугаслы снаряд

**ФУГОВÁНИЕ** *с*; *спец. см.* **фуговáть**

**ФУГОВÁТЬ** *несов. что*; *спец.* **1.** фуган менән йышыу **2.** (*плотно пригонять*) йышып тигеҙләү

**ФУГÓВКА** *ж* **1.** *спец. см.* **фуговáть 2.** йышыу станогы

**ФУГÓВОЧНЫЙ,** -ая, -ое йышыу ...ы; **фугóвочный станóк** йышыу станогы

**ФÝГОВЫЙ,** -ая, -ое *муз.* фуга ...ы; **фýговый стиль** фуга стиле

**ФУЖÉР** *м* фужер (*эсемлек һәм винолар өсөн тәғәйенләнгән оҙон аяҡлы ҙур бокал*)

**ФÝКАТЬ** *несов. см.* **фýкнуть**

**ФÝКНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*произнести "фу", "ф-ф"*) "фу" ("уф", "ф-ф") тип әйтеү **2.** *что, на что* (*дунуть*) өрөү, сәсрәтеү, өрөп (сәсрәтеп) һүндереү, өрөүҙән (сәсрәтеүҙән) һүнеү; **фýкнуть в лицó одувáнчиком** биткә бәпембә менән өрөү; **свечá фýкнула** май шәм өрөүҙән һүнде **3.** (*фыркнуть*) фырылдау, бышҡырыу; **конь фýкнул** ат бышҡырҙы **4.** *кого*; *груб.*, *прост.* (*выгнать, прогнать*) ҡыуыу, ҡыуып сығарыу **5.** *что*; *прост.* (*быстро израсходовать, потратить*) тотоноу, тотоноп бөтөү; **он фýкнул дéнежки** аҡсаны тотоноп бөттө **6.** *что* (*в игре в шашки*) фукка алыу

**ФУКСИ́Н** *м*; *хим.* фуксин (*ҡыҙыл төҫтәге анилин буяу*)

**ФÝКСИЯ** *ж* фуксия, тамсы гөлө, алҡа гөл

**ФУЛЯ́Р** *м* фуляр (*йоҡа һәм йомшаҡ ебәк туҡыма*)

**ФУЛЯ́РОВЫЙ,** -ая, -ое фуляр, фулярҙан тегелгән; **фуля́ровый платóк** фуляр яулыҡ; **фуля́ровое плáтье** фуляр күлдәк

**ФУНДÁМЕНТ** *м* **1.** фундамент, нигеҙ; **дом на кáменном фундáменте** таш нигеҙҙәге өй **2.** *перен.* нигеҙ, таяныс; **фундáмент экономики** иҡтисад нигеҙе; **наýчный фундáмент** ғилми нигеҙ

**ФУНДАМЕНТÁЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** (*прочность*) фундаменталлек, ҡеүәтле булыу, ныҡлылыҡ; **промы́шленные гигáнты послéдних лет отличáются своéй фундаментáльностью** һуңғы йылдарҙағы сәнәғәт гиганттары үҙҙәренең ҡеүәтле булыуы менән айырылып тора **2.** *перен.* (*солидность, глубина*) фундаменталлек, төплөлөк, тәрәнлек; **её систéма преподавáния отличáется фундаментáльностью** уның уҡытыу системаһы төплөлөгө менән айырыла

**ФУНДАМЕНТÁЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*прочный*) фундаменталь, ныҡлы, ҡеүәтле; **фундаментáльная пострóйка** фундаменталь төҙөлөш **2.** *перен.* (*солидный, глубокий*) фундаменталь, нигеҙле, төплө, тәрән; **фундаментáльное исслéдование** тәрән тикшеренеүҙәр **3.** *разг.*, *шутл.* ҙур, мул; **фундаментáльный ýжин** мул киске аш; **фундаментáльная дóза** ҙур доза **4.** (*основной*) фундаменталь, төп, баш; **фундаментáльная библиотéка** төп китапхана

**ФУНДÁМЕНТНЫЙ,** -ая, -ое фундамент ...ы, нигеҙ ...ы; **фундáментная плитá** нигеҙ плитаһы; **фундáментная вы́емка** нигеҙ соҡоро

**ФУНДÝК** *м* фундук, урман сәтләүеге (*ҡыуаҡ һәм уның емеше*)

**ФУНИКУЛЁР** *м* фуникулёр (*текә урындарҙа канат ярҙамында тарттырылып йөрөтөлә торған тимер юл, поезд*)

**ФУНКЦИОНÁЛЬНЫЙ,** -ая, -ое функциональ; **функционáльная зави́симость** функциональ бәйлелек; **функционáльный анáлиз** функциональ анализ; **функционáльное расстрóйство сердéчной дéятельности** йөрәк эшмәкәрлегенең функциональ боҙолоуы ♦ **функционáльная систéма** функциональ система (*эшсегә йәки эшселәр төркөмөнә ниндәйҙер эште айырым функцияларға, операцияларға бүлеп биреү*)

**ФУНКЦИОНИ́РОВАНИЕ** *с см.* **функциони́ровать**

**ФУНКЦИОНИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** эшләү, эшләп тороу, хәрәкәттә булыу; **тра́нспорт ещё функциони́рует** транспорт әле эшләп тора **2.** (*в качестве кого-чего-л.*) булып сығыш яһау

**ФУ́НКЦИЯ** *ж* **1.** (*явление, зависящее от другого*) функция **2.** *мат.* функция; **тригономе-три́ческие фу́нкции** тригонометрик функциялар **3.** *биол.* функция, эшмәкәрлек; **жи́зненные фу́нкции органи́зма** организмдың йәшәү функциялары **4.** *перен.* (*обязанность, круг деятельности*) функция, йөкләтелгән эш, вазифа, бурыс; **э́то его́ пряма́я фу́нкция** был уның төп бурысы **5.** (*значение, назначение*) функция, мәғәнә, әһәмиәт; **фу́нкция имени́тельного падежа́** төп килештең мәғәнәһе; **фу́нкции де́нег** аҡсаның әһәмиәте

**ФУНТ I** *м* **1.** *уст.* (*мера веса*) ҡаҙаҡ (*409,5 грамлы боронғо урыҫ үлсәү берәмеге*) **2.** фунт (*Англия, Бельгия һ.б. илдәрҙә 453,6 грамлы үлсәү берәмеге*) ♦ **вот так фунт!** бына һиңә мә!; **не фунт изю́му** был картуф ашау түгел, был бәләкәй эш түгел; **узна́ть, почём фунт ли́ха** донъяның әсеһен-сөсөһөн татыу

**ФУНТ II: фунт сте́рлингов** фунт стерлинг (*Бөйөк Британия аҡса берәмеге*)

**ФУ́НТИК** *м* **1.** *ласк. от* **фунт** I 1; **2.** *разг.* (*бумажный кулёк*) фунтик (*буранкаға оҡшатып яһалған бәләкәй ҡағыҙ ҡап*)

**ФУ́РА** *ж* **1.** (*большая, длинная телега*) оҙон арба **2.** *см.* **фурго́н**

**ФУРА́Ж** *м* фураж (*мал аҙығы*); **загото́вить фура́ж** фураж әҙерләү

**ФУРАЖИ́Р** *м* фуражсы (*мал аҙығы өсөн яуаплы хеҙмәткәр*)

**ФУРА́ЖКА** *ж* фуражка; **фура́жка шко́льника** уҡыусы фуражкаһы

**ФУРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** фураж ...ы; **фура́жные фо́нды** фураж фондтары; **фура́жное зерно́** фураж игене **2.** фураж өсөн; **фура́жный ваго́н** фураж өсөн вагон ♦ **фура́жная коро́ва** *с.-х.* фураж һыйыры (*өҫтәмә аҙыҡ бирелә торған һауын һыйыр*)

**ФУРГО́Н** *м* фургон (*өҫтө ябыулы арба йәки автомашина*)

**ФУРГО́НЩИК** *м* фургонсы (*фургон күсере*)

**ФУ́РИЯ** *ж* фурия (**1.** *Боронғо Рим мифологияһында үс алыусы алиһә* **2.** *усал ҡатын*)

**ФУРНИТУ́РА** *ж*; *спец.* фурнитура (*кустарсылыҡ эшендә, башҡа етештерец өлкәһендә ҡулланылған ярҙамсы материал*); **галантере́йная фурниту́ра** галантерея фурнитураһы; **сапо́жная фурниту́ра** итек фурнитураһы

**ФУРНИТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое фурнитура ...ы; **фурниту́рный цех** фурнитура цехы

**ФУРО́Р** *м* шау-шыулы уңыш, шаҡ ҡатырыу; **произвести́ фуро́р** шау-шыулы уңышҡа өлгәшеү

**ФУРУ́НКУЛ** *м* һыҙлауыҡ, ваҡ сиҡан, фурункул

**ФУРУНКУЛЁЗ** *м*; *мед.* һыҙлауыҡ (ваҡ сиҡан) баҫыу, фурункулёз

**ФУРУНКУЛЁЗНЫЙ,** -ая, -ое һыҙлауыҡ (ваҡ сиҡан) баҫҡан, фурункулёзлы

**ФУТ** *м* (*мера длины*) фут (*30,48 см тиң оҙонлоҡ үлсәү берәмеге*)

**ФУТБО́Л** *м* футбол

**ФУТБОЛИ́СТ** *м* футболсы (*футбол уйнаусы*)

**ФУТБО́ЛКА** *ж* футболка (*кейем*)

**ФУТБО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое футбол ...ы; **футбо́льный мяч** футбол тубы; **футбо́льная кома́нда** футбол командаһы

**ФУТЛЯ́Р** *м* футляр, ҡап, һауыт, тышлыҡ; (*ножны*) ҡын; **футля́р для очко́в** күҙлек һауыты ♦ **челове́к в футля́ре** футлярҙағы кеше (*үҙенең тар ҡарашына, мәнфәғәттәренә генә бикләнгән, яңылыҡтарҙан ҡурҡа торған кеше*)

**ФУТУРИ́ЗМ** *м* футуризм (*XX б. башында сәнғәттә һәм әҙәбиәттә реализмды инҡар итеүсе формалистик йүнәлеш*); **за́падный футури́зм** көнбайыш футуризмы

**ФУТУРИ́СТ** *м* футурист (*футуризмға эйәреүсе*)

**ФУТУРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое футуристик, футуризм ...ы; **футуристи́ческий манифе́ст** футуризм манифесы; **футуристи́ческие стихи́** футуристик шиғырҙар

**ФУТУРИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое футуризм ...ы, футурист(тар) ...ы; **футури́стский журна́л** футуристар журналы

**ФУТУРОЛО́ГИЯ** *ж* футурология (*киләсәкте алдан күрә белеү ҡанундары һәм ысулдары тураһындағы фән*)

**ФУФА́ЙКА** *ж* **1.** куфайка (*бәйләнгән йылы күлдәк йәки еңһеҙ кофта*) **2.** (*стёганка*) фуфайка, һырма

**ФУФУ́: на фуфу́** өҫтән-мөҫтән генә, арлы-бирле генә, нисек етте шулай

**ФЫ́РКАНЬЕ** *с см.* **фы́ркать**

**ФЫ́РКАТЬ** *несов.* **1.** бышҡырыу; **фы́ркали ко́ни** аттар бышҡырҙы **2.** *разг.* (*смеяться*) бырхылдау, пырх итеп көлөү, шырҡылдап көлөү; **па́рни отвора́чивались и фы́ркали** егеттәр арттарына әйләнеп бырхылдап көлдө **3.** (*прерывисто, с шумом выпускать воздух, пар*) пышылдау, ухылдау; **парово́з фы́ркал** паровоз ухылданы **4.** *перен.*, *разг.* (*брюзжать*) мығырлау, һуҡраныу, мыжыу; **она́ постоя́нно фы́ркает** ул һәр ваҡыт мыжый

**ФЫ́РКНУТЬ** *сов. см.* **фы́ркать**; **управля́ющий недово́льно фы́ркнул** управляющий ризаһыҙлыҡ менән һуҡранып алды

**ФЮЗЕЛЯ́Ж** *м*; *ав.* фюзеляж

**ФЮЗЕЛЯ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *ав.* фюзеляж ...ы; **фюзеля́жная моде́ль** фюзеляж моделе

**ФЮЙТЬ** и **ФЬЮТЬ** *межд. в знач. сказ.*; *разг.* (*при обозначении удаления, исчезновения кого-чего-л.*) фйү, шыйҙы, шылды, тайҙы

# Х

**ХАДЖ** *м*; *рел.* хаж; **совершáть хадж** хаж ҡылыу

**ХАДЖИ́** *м нескл.* хажи

**ХÁЖИВАТЬ** *несов.*; *разг. см.* **ходи́ть** 1, 3—5, 13

**ХАЗÁРСКИЙ,** -ая, -ое хазар ...ы; **хазáрский язы́к** хазар теле

**ХАЗÁРЫ** *мн.* хазарҙар, хазар халҡы (*боронғо төрки халыҡ*)

**ХАКÁССКИЙ,** -ая, -ое хакас ...ы, Хакасия ...ы; **хакáсский язы́к** хакас теле

**ХАКÁСЫ** *мн.* хакастар, хакас халҡы // *ед.* **хакáс** *м* хакас ир-аты; **хакáска** *ж* хакас ҡатын-ҡыҙы

**ХÁКИ 1.** *прил. неизм.* (*цвет*) һорғолт йәшел, йәшкелт һоро, көрәнһыу йәшел; **рубáшка цвéта хáки** һорғолт йәшел күлдәк **2.** *с нескл.* (*ткань, форменная одежда из этой ткани*) хаки; **человéк в хáки** хаки кейгән кеше

**ХÁЛА** *ж* хала (*ишелгән ҡалас*)

**ХАЛÁТ** *м* **1.** сапан; **узбéкский халáт** үзбәк сапаны **2.** халат; **больни́чный халáт** хәстәхана халаты; **жéнский халáт** ҡатын-ҡыҙҙар халаты; **лю́ди в бéлых халáтах** аҡ халатлы кешеләр

**ХАЛÁТНОСТЬ** *ж* (эшкә) һалҡын ҡарау (ҡараш), иғтибарһыҙлыҡ; **прояви́ть халáтность** һалҡын ҡараш күрһәтеү

**ХАЛÁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** халатлыҡ, халат тегә торған; **халáтная ткань** халатлыҡ туҡыма **2.** *разг.* (*небрежный*) һалҡын, иғтибарһыҙ, һүлпән; **халáтное отношéние к рабóте** эшкә һалҡын мөнәсәбәт

**ХАЛВÁ** *ж* хәлүә (*шәрбәтле ашамлыҡ*); **орéховая халвá** сәтләүек хәлүәһе

**ХАЛИ́Ф** *м*; *ист.* хәлифә (*мосолман илдәрендә юғары феодаль хаким титулы*) ♦ **хали́ф на час** *ирон.* бер сәғәтлек хәлифә (*ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына хакимиәт башында торған кеше*)

**ХАЛИФÁТ** *м*; *ист.* хәлифәлек (**1.** *башында хәлифә торған феодаль мосолман дәүләте* **2.** *мосолман теократияһы системаһы*)

**ХАЛТУ́РА** *ж*; *разг.* **1.** (*небрежная работа*) халтура, иренеп (өҫтән-мөҫтән генә, илке-һалҡы ғына) башҡарылған эш **2.** (*побочный заработок*) анһат кәсеп, еңел табылған аҡса

**ХАЛТУ́РИТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** (*небрежно работать*) иренеп (өҫтән-мөҫтән генә, илке-һалҡы ғына) эшләү **2.** (*подрабатывать*) еңел аҡса табыу

**ХАЛТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* иренеп (өҫтән-мөҫтән, илке-һалҡы, насар) эшләнгән; **халту́рная рабóта** өҫтән-мөҫтән эшләнгән эш

**ХАЛТУ́РЩИК** *м* и **ХАЛТУ́РЩИЦА** *ж*; *разг.* халтурасы, иренеп (өҫтән-мөҫтән) эшләүсе

**ХАЛУ́ПА** *ж*; *разг., пренебр.* (*убогое жилище*) аласыҡ, насар (ташландыҡ) өй

**ХАЛЦЕДÓН** *м* халцедон (*кварцтың бер төрө булған ярым аҫыл таш*)

**ХАЛЦЕДÓНОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** халцедон ...ы **2.** халцедон, халцедондан яһалған

**ХАМ** *м* и **ХÁМКА** *ж*; *разг., бран.* тупаҫ, оятһыҙ, битһеҙ (кеше)

**ХАМЕЛЕÓН** *м* **1.** *зоол.* хамелеон (*төҫөн үҙгәртә торған һөйрәлеүсе йәнлек*) **2.** *перен.* хамелеон, монафиҡ, ике йөҙлө кеше

**ХАМИ́ТЬ** *несов.*; *прост.* оятһыҙ ҡыланыу, тупаҫланыу, оятһыҙланыу

**ХАМСÁ** *ж* ҡамса, хамса (*ваҡ диңгеҙ балығы*)

**ХÁМСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* оятһыҙ, әшәке, тупаҫ; **хáмский постýпок** оятһыҙ ҡыланыш

**ХÁМСТВО** *с*; *разг.* тупаҫлыҡ, оятһыҙлыҡ, әшәкелек

**ХАМСÓВЫЙ,** -ая, -ое ҡамса, хамса, ҡамса ...ы, хамса ...ы; **хамсóвый лов** ҡамса аулау

**ХАН** *м* хан

**ХАНДРÁ** *ж* күңел төшөнкөлөгө, кәйефһеҙләнеү, эс бошоу

**ХАНДРИ́ТЬ** *несов.* бошоноу, кәйефһеҙләнеү, күңелһеҙләнеү

**ХАНЖÁ** *м* и *ж*; *разг.* монафиҡ, ике йөҙлө кеше

**ХÁНЖЕСКИЙ** и **ХАНЖЕСКÓЙ,** -ая, -ое монафиҡтарса, монафиҡ (*ике йөҙлө кешегә хас булған*); **хáнжеское поведéние** монафиҡтарса ҡыланыу

**ХÁНЖЕСТВО** и *уст.* **ХАНЖЕСТВÓ** *с* монафиҡлыҡ, ике йөҙлөлөк, эскерлелек

**ХÁНСКИЙ,** -ая, -ое хан ...ы; **хáнское вóйско** хан ғәскәре; **хáнские зéмли** хан ерҙәре

**ХÁНСТВО** *с*; *ист.* ханлыҡ; **Казáнское хáнство** Ҡазан ханлығы

**ХÁНТЫ** *мн.* (*ед.* **хáнты** *м* и *ж нескл.*) ханттар, хант халҡы; *см.* **ханты́йцы**

**ХАНТЫ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое хант ...ы; **ханты́йский язы́к** хант теле

**ХАНТЫ́ЙЦЫ** *мн.* ханттар, хант халҡы // *ед.* **ханты́ец** *м* хант ир-аты; **ханты́йка** *ж* хант ҡатын-ҡыҙы

**ХÁНША** *ж* ханбикә, ханса; **стать хáншей** ханбикә булыу

**ХÁОС** и **ХАÓС** *м* **1.** *миф.* хаос (*боронғо грек мифологияһында донъя барлыҡҡа килгәнгә тиклемге стихия*) **2.** (*беспорядок*) тәртипһеҙлек, сыуалсыҡлыҡ, буталсыҡлыҡ; **в дóме хáос** өйҙә тәртипһеҙлек

**ХАОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тәртипһеҙ, сыуалсыҡ, буталсыҡ

**ХАОТИ́ЧНОСТЬ** *ж* тәртипһеҙлек, буталсыҡлыҡ, сыуалсыҡлыҡ

**ХАОТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **хаоти́ческий**

**ХА́ПАТЬ** *несов. см.* **ха́пнуть**

**ХА́ПНУТЬ** *сов. кого-что* и *без доп.*; *прост.* **1.** (*схватить*) тотоп (эләктереп) алыу **2.** (*украсть*) сәлдереү, урлау, урлап алыу

**ХАПУ́ГА** *м* и *ж*; *прост.* ришүәтсе, урлаусы, сәлдереүсе, бур

**ХАРАКИ́РИ** *с нескл.* харакири (*Япония самурайҙарының үҙҙәрен үҙҙәре үлтереү йолаһы*)

**ХАРА́КТЕР** *м* **1.** холоҡ, тәбиғәт, характер; **мя́гкий хара́ктер** йомшаҡ характер; **плохо́й хара́ктер** насар холоҡ **2.** (*отличительное свойство*) төҫ, үҙенсәлек, сифат, характер; **хара́ктер по́чвы** тупраҡ үҙенсәлеге **3.** (*твёрдая, сильная воля*) (көслө) ихтыяр, ныҡышмалылыҡ, характер; **челове́к с хара́ктером** ихтыярлы кеше **4.** *лит., иск.* (*образ*) характер ♦ **в хара́ктере** *чьём кемгәләр* хас булыу, оҡшау; **вы́держать хара́ктер** *см.* **вы́держать**

**ХАРАКТЕРИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* **1.** (*дать характеристику*) ҡылыҡһырлау, характерлау **2.** (*составить отличительную черту*) билдәләү, күрһәтеү, һүрәтләү; **э́тот посту́пок хорошо́ характеризу́ет её** был ҡылыҡ уның кемлеген яҡшы күрһәтә

**ХАРАКТЕРИЗОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** характерланыу, айырылыу, айырылып тороу **2.** *страд. от* **характеризова́ть** 1

**ХАРАКТЕРИ́СТИКА** *ж*; *в разн. знач.* характеристика; **дать характери́стику геро́я рома́на** романдың геройына характеристика биреү; **брать характери́стику с ме́ста рабо́ты** эш урынынан характеристика алыу; **силова́я характери́стика** *тех.* көс характеристикаһы

**ХАРАКТЕРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **характе́рный** 1, 3

**ХАРАКТЕ́РНОСТЬ** *ж* үҙенә генә хас, үҙенсәлекле булыу, характерлылыҡ

**ХАРАКТЕ́РНЫЙ** и *уст., прост.* **ХАРА́КТЕРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҙенсәлекле, үҙенә генә хас, үҙенә бер төрлө; **характе́рная черта́** үҙенә генә хас һыҙат **2.** характерлы (*билдәле бер осорға, халыҡҡа хас*); **характе́рные та́нцы** характерлы бейеүҙәр **3.** характерлы, хас; **характе́рный для се́вера кли́мат** төньяҡҡа хас климат **4.** ихтыярлы, ныҡышмалы; **хара́ктерный челове́к** ихтыярлы кеше

**ХА́РИУС** *м* бәрҙе (*балыҡ*); **кру́пный ха́риус** ҡара бәрҙе; **ме́лкий ха́риус** күк бәрҙе, бәрҙесәк

**ХА́РКАТЬ** *несов.*; *разг.* ҡаҡырыу, ҡаҡырып ҡуйыу

**ХА́РКНУТЬ** *сов. см.* **ха́ркать**

**ХА́РТИЯ** *ж* хартия (**1.** *боронғо ҡулъяҙма* **2.** *сәйәси. ҡайһы бер ижтимағи-сәйәси йөкмәткеле документтарҙың исеме*)

**ХАРЧЕ́ВНЯ** *ж*; *уст.* ашхана

**ХАРЧИ́** *мн.* (*ед.* **харч** *м*); *прост.* аҙыҡ-түлек, аш-һыу, ашамлыҡ

**ХАРЧО́** *с нескл.*; *кул.* харчо

**ХА́ТА** *ж* өй, балсыҡ өй ♦ **моя́ ха́та с кра́ю** минең (унда) эшем юҡ, был эштә минең ҡыҫылышым юҡ

**ХА-ХА́** *межд.* ха-ха (*шарҡылдап көлөү*)

**ХА́ЯТЬ** *несов. кого-что*; *прост.* һүгеү, хурлау, яманлау

**ХВАЛА́** *ж* **1.** маҡтау, хуплау; **досто́йный хвалы́** маҡтауға лайыҡ **2.** *высок.* дан, маҡтау; **хвала́ а́рмии!** армияға дан!

**ХВАЛЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое маҡтау ...ы, дан ...ы; **хвале́бная пе́сня** маҡтау йыры

**ХВАЛЁНЫЙ,** -ая, -ое *ирон.* маҡталған, маҡтаулы; **где ва́ши хвалёные рабо́тнички?** ҡайҙа һеҙҙең маҡтаулы эшселәрегеҙ?

**ХВАЛИ́ТЬ** *несов. кого-что* маҡтау, хуплау; **хвали́ть ученика́ за стара́ние** уҡыусыны тырышлығы өсөн маҡтау

**ХВАЛИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** маҡтаныу; **хвали́ться свои́ми зна́ниями** белемең менән маҡтаныу; **чрезме́рно хвали́ться** артыҡ маҡтаныу **2.** *страд. от* **хвали́ть**

**ХВА́СТАТЬ** *несов.*; *разг. см.* **хва́статься**; **нача́ть хва́стать** маҡтанырға тотоноу

**ХВА́СТАТЬСЯ** *несов.* маҡтаныу, шапырыныу, эре сирттереү; **хва́статься свои́м про́шлым** үткәнең менән маҡтаныу

**ХВАСТЛИ́ВОСТЬ** *ж* маҡтансыҡлыҡ, шапырыныусанлыҡ

**ХВАСТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое маҡтансыҡ, шапырынырға яратыусан; **хвастли́вый ма́льчик** маҡтансыҡ малай

**ХВАСТОВСТВО́** *с* маҡтансыҡлыҡ, шапырыныу, маҡтаныу; **пусто́е хвастовство́** буш маҡтансыҡлыҡ

**ХВАСТУ́Н** *м* и **ХВАСТУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* маҡтансыҡ, ҡупым

**ХВАСТУНИ́ШКА** *м* и *ж см.* **хвасту́н**

**ХВАТ** *м*; *разг.* йылғыр, ҡулсыр, осҡор

**ХВАТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое эләктерә (тота) торған; **хвата́тельные о́рганы насеко́мых** бөжәктәрҙең эләктерә торған ағзалары

**ХВАТА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* йәбешеү, эләктереү, эләктереп алыу; **хвата́ть за́ руку** ҡулдан эләктереп алыу **2.** *кого*; *разг.* (*ловить*) тотоу, ҡулға алыу; **хвата́ть престу́пников** енәйәтселәрҙе тотоу **3.** *что*; *разг.* (*поспешно, без разбора приобретать*) алыу, йәбешеү; **хвата́ть что попа́ло** ни тура килһә, шуны алыу **4.** *см.* **хвати́ть** 4, 6, 10; **де́нег хвата́ет** аҡса етә; **еды́ хвата́ет** ашау етә; **ума́ не хвата́ет** аҡыл етмәй ♦ **хвата́ть на лету́**; **хвата́ть с лёту** *см.* **лёт**; **хвата́ть за́ душу** *см.* **брать**; **э́того ещё не хвата́ло!** шул ғына етмәгәйне!

**ХВАТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *за кого-что*; *разг.* тотоноу, тотоу, йәбешеү; **хвата́ться за го́лову** башҡа тотоноу **2.** *за что*; *перен.* (*начинать делать что-л.*) тотоноу, керешеү; **хвата́ться за всё** бөтәһенә лә бер юлы тотоноу **3.** *страд. от* **хвата́ть** 1—3 ♦ **хвата́ться за́ голову** ни эшләргә

белмәү, өмөтһөҙлөк хәленә төшөү; **хвата́ться за соло́минку** *см.* **соло́минка**

**ХВАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **хвата́ть** 1; **2.** *перен.*, *разг.* (*испытать*) күреү, кисереү; **хвати́ть го́ря** ҡайғы кисереү **3.** *безл.* (*поразить*, *причинить вред*) һуғыу, тейеү; **моро́зом хвати́ло посе́вы** сәсеүлектәргә һыуыҡ тейгән **4.** *чего безл.* (*быть достаточным*) етеү, етешеү, булыу; **воды́ хва́тит на це́лый день** һыу көн буйына етер **5.** *в 3 л. ед. ч. безл.* **хва́тит**; *разг.* (*довольно*) етер; **хва́тит спо́рить** бәхәсләшеү етер **6.** *что*; *прост.* (*урвать*) алыу; **хвати́ть куш** ришүәт алыу **7.** *что* и *без доп.*; *прост.* (*выпить*) эсеп ебәреү, төшөрөп алыу; **хвати́ть ли́шнего** артыҡ төшөрөп алыу **8.** *разг.* (*допустить преувеличение*) үтә арттырып ебәреү, әйтеп ташлау **9.** *кого-что*, *чем*; *прост.* (*ударить*) һуғыу, ҡундырыу, бәреү; **хвати́ть кулако́м по́ столу** йоҙроҡ менән өҫтәлгә һуғыу **10.** *кого*, *на что безл.*; *разг.* (*оказаться в силах сделать что-л.*) булдырыу, ҡулынан килеү ♦ **хвати́ть че́рез край** *см.* **край**

**ХВАТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-чего* и *без доп.* эҙләй башлау, эҙләргә тотоноу; **хвати́ться ключе́й** асҡысты эҙләй башлау **2.** (*спохватиться*) һиҙеп (белеп) ҡалыу; **по́здно хвати́ться** һуңлап һиҙеп ҡалыу

**ХВА́ТКА** *ж* **1.** алым, таһыл, тотоу; **це́пкая хва́тка** ныҡ тотоу **2.** *перен.*, *разг.* таһыллыҡ, булдыҡлылыҡ; **прояви́ть делову́ю хва́тку** эштә таһыллыҡ күрһәтеү

**ХВА́ТКИЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** ҡаты (ныҡ) тотоусан, алғыр; **хва́ткий орёл** алғыр бөркөт **2.** *перен.* йылғыр, зирәк, үткер; **хва́ткий ум** зирәк аҡыл

**ХВО́ЙНИК** *м* ҡыҙылса; **хво́йник двухколоско́вый** ике башаҡлы ҡыҙылса, ҡушбашаҡ үлән

**ХВО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ылыҫ, ылыҫ ...ы; **хво́йное ма́сло** ылыҫ майы **2.** ылыҫлы; **хво́йный лес** ылыҫлы урман **3.** *в знач. сущ.* **хво́йные** *мн.*; *бот.* ылыҫлылар ♦ **хво́йные ва́нны** ылыҫлы ванна

**ХВОРА́ТЬ** *несов.*; *разг.* ауырыу, сирләү, сырхау; **си́льно хвора́ть** ҡаты сирләү

**ХВО́РОСТ** *м собир.* **1.** (*ветви деревьев или кустарников*) сытыр, сытыр-сатыр, сыбыҡ-сабыҡ; (*ветви хвойных деревьев*) йәйек; **собира́ть хво́рост** сыбыҡ-сабыҡ йыйыу **2.** *кул.* (*печенье*) ҡош теле

**ХВОРОСТИ́НА** *ж* ҡыу сыбыҡ, ҡоро ботаҡ

**ХВОРОСТИ́НКА** *ж*; *уменьш. от* **хворости́на**

**ХВО́РОСТЬ** *ж*; *прост. см.* **хворь**

**ХВОРОСТЯНО́Й,** -ая, -ое сытыр ...ы, сыбыҡ-сабыҡ ...ы, йәйек ...ы; **хворостяна́я ку́ча** сыбыҡ-сабыҡ өйөмө

**ХВО́РЫЙ,** -ая, -ое *прост.* ауырыу, сирле, сирләшкә

**ХВОРЬ** *ж*; *прост.* ауырыу, сир; **избавля́ться от хво́ри** сирҙән ҡотолоу

**ХВОСТ** *м* **1.** *в разн. знач.* ҡойроҡ; **ко́нский хвост** ат ҡойроғо; **хвост по́езда** поезд ҡойроғо; **хвост самолёта** самолёт ҡойроғо; **у него́ хвосты́ по хи́мии** уның химиянан ҡойроғо бар **2.** *разг.* (*очередь*) сират; **хвост за биле́тами** билетҡа сират ♦ **поджа́ть хвост** *прост.* ҡойроҡто ҡыҫыу, шым булыу; **виля́ть (верте́ть) хвосто́м** *прост.* ҡойроҡ болғау; **(и) в хвост и в гри́ву** *прост.* бөтә көскә; **задра́ть хвост** *прост.* эреләнеү

**ХВОСТА́ТЫЙ,** -ая, -ое ҡойроҡло; **хвоста́тые земново́дные** ҡойроҡло ер-һыу хайуандары

**ХВО́СТИК** *м*; *уменьш. от* **хвост** ♦ **с хво́стиком** артығы менән

**ХВОСТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡойроҡ ...ы; **хвостово́й плавни́к** ҡойроҡ йөҙгөсө; **хвостово́й позвоно́к** *анат.* ҡойроҡ умыртҡаһы **2.** ҡойроҡтағы, артҡы, арттағы; **хвостовы́е ваго́ны** артҡы вагондар

**ХВОЩ** *м* ҡырҡбыуын, шыршы үлән; **полево́й хвощ** баҫыу ҡырҡбыуыны

**ХВО́Я** *ж* ылыҫ; **сосно́вая хво́я** ҡарағай ылыҫы; **зелёная хво́я** йәшел ылыҫ

**ХЕ́ДЕР** *м*; *с.-х.* хедер (*комбайндың ура торған өлөшө*)

**ХЕК** *м* хек (*диңгеҙ балығы*)

**ХЕ́РЕС** *м* херес (*шараптың бер төрө*)

**ХЕРУВИ́М** *м* фәрештә, баш фәрештә (*христиан динендә*)

**ХЕ-ХЕ́** *межд.* һи-һи (*кеткелдәп көлөү*)

**ХИБА́РА** *ж*; *разг.* бәләкәй насар өй

**ХИ́ДЖРА** *ж* (*начало мусульманского летоисчисления*) һижрәт

**ХИ́ЖИНА** *ж* бәләкәй өй

**ХИЛЕ́ТЬ** *несов.*; *прост.* ҡаҡшау, мөсһөҙләнеү, хәлһеҙләнеү, әлһерәү

**ХИ́ЛОСТЬ** *ж* сибеклек, хәлһеҙлек, мөсһөҙлөк

**ХИ́ЛЫЙ,** -ая, -ое сибек, мөсһөҙ, хәлһеҙ; **быть хи́лым** мөсһөҙ булыу; **хи́лый челове́к** сибек кеше

**ХИМЕ́РА** *ж* **1.** *миф.* Химера (*боронғо грек мифологияһында арыҫлан башлы аждаһа*) **2.** *перен.* (*несбыточная мечта*, *фантазия*) буш өмөт, хыял **3.** *мн.* **химе́ры**; *зоол.* химерҙар (*диңгеҙ балығы төрө*)

**ХИМЕРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *книжн.* буш, хыялый (*бойомға ашырырлыҡ булмаған*)

**ХИМИЗА́ЦИЯ** *ж* химиялаштырыу

**ХИМИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *что* химиялаштырыу

**ХИ́МИК** *ж* химик

**ХИМИКА́ЛИИ** *мн.*; *спец.* химикалийҙар; **обраба́тывать зе́млю химика́лиями** тупраҡты химикалийҙар менән эшкәртеү

**ХИМИКА́ТЫ** *мн.* (*ед.* **химика́т** *м*); *спец.* химикаттар (*химик препараттар*)

**ХИМИОТЕРАПИ́Я** *ж*; *мед.* химиотерапия (*химик препараттар менән дауалау*)

**ХИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* химия ...ы, химик; **хими́ческие сре́дства защи́ты расте́ний** үҫемлектәрҙе химик һаҡлау саралары; **хими́ческий соста́в древеси́ны** үҙағастың химик со-

ставы; **хими́ческая лаборато́рия** химия лабораторияһы ♦ **хими́ческий каранда́ш** химик ҡәләм (*графиты буяулы ҡәләм*)

**ХИ́МИЯ** *ж* **1.** химия; **неоргани́ческая хи́мия** органик булмаған химия **2.** (*качественный состав чего-л.*) химия, химик состав; **хи́мия не́фти** нефттең химик составы

**ХИ́НА** *ж*; *разг. см.* **хини́н**

**ХИ́НДИ** *м нескл.* һинди (*Һиндостандың дәүләт теле*)

**ХИНИ́Н** *м*; *фарм.* хинин (*дарыу итеп ҡулланыла*)

**ХИ́ННЫЙ,** -ая, -ое хина ...ы, хиналы; **хи́нное мы́ло** хиналы һабын ♦ **хи́нное де́рево** хина ағасы (*мәңге йәшел тропик ағас*)

**ХИРЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** (*о человеке*) ябығыу, хәлһеҙләнеү, әлһерәү; (*о растениях*) ҡороу, һулыу, шиңеү; **де́рево хире́ет** ағас ҡорой **2.** *перен.* (*приходить в упадок*) емерелеү, һүнеү, бөтөү

**ХИРОМА́НТ** *м* и **ХИРОМА́НТКА** *ж* хиромант, күрәҙәсе, күрәҙәлек итеүсе

**ХИРОМА́НТИЯ** *ж* хиромантия, күрәҙәлек (*устағы һыҙаттарға ҡарап күрәҙәлек итеү*)

**ХИРУ́РГ** *м* хирург

**ХИРУРГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое хирургия ...ы, хирургик; **хирурги́ческие сре́дства** хирургик саралар; **хирурги́ческая опера́ция** хирургик операция

**ХИРУРГИ́Я** *ж* (*раздел медицины*) хирургия; **эксперимента́льная хирурги́я** эксперименталь хирургия

**ХИТИ́Н** *м*; *биол.* хитин (*бөжәк, ҡыҫала, үрмәксе кеүек быуынтыҡ аяҡлыларҙың тиресәһендәге органик матдә*)

**ХИТО́Н** *м* хитон (**1.** *боронғо гректарҙа эске күлдәк* **2.** *балет артистары кейгән еңһеҙ күлдәк*)

**ХИТРЕ́Ц** *м* хәйләкәр; **у хитреца́ глаза́ не просыха́ют** хәйләкәрҙең күҙе йәшле булыр

**ХИТРЕЦА́** *ж*; *разг.* хәйлә; **она́ не без хитрецы́** ул хәйләһеҙ түгел

**ХИТРИ́НКА** *ж*; *разг. см.* **хитреца́**; **взгляд с хитри́нкой** хәйләле ҡараш

**ХИТРИ́ТЬ** *несов.* **1.** (*лукавить*) хәйләләшеү, хәйлә ҡороу, мутлашыу; **хитри́ть в рабо́те** эштә хәйләләшеү **2.** *разг.* (*проявлять изворотливость*) уйлап табыу, баш ватыу; **как ни хитри́** күпме генә баш ватһаң да

**ХИ́ТРО** и **ХИТРО́** *нареч.* **1.** мут, хәйләкәр, хәйләле; **хи́тро улыба́ться** хәйләле йылмайыу **2.** (*замысловато*) серле, хикмәтле

**ХИТРОСПЛЕТЕ́НИЕ** *с* **1.** (*вычурное изложение*) (фекерҙе) ҡатмарлы итеп әйтеү, уратып һөйләү **2.** (*коварный замысел*) мәкерле (хәйләле) уй (ниәт)

**ХИ́ТРОСТЬ** *ж* **1.** хәйлә, хәйләкәрлек, мәкер(лек); **хи́трость на лице́ напи́сана** хәйләкәрлеге йөҙөнә сыҡҡан; **приду́мывать хи́трость** хәйлә табыу **2.** (*уловка*) мутлыҡ **3.** *разг.* (*сложность*) хикмәт; **вот в чём хи́трость** бына хикмәте ниҙә икән

**ХИТРОУ́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** хәйләле, хәйләкәр; **хитроу́мный за́мысел** бик хәйләле ниәт **2.** (*замысловатый*) хикмәтле, серле; **хитроу́мный замо́к** хикмәтле йоҙаҡ

**ХИ́ТРЫЙ,** -ая -ое **1.** мут, хәйләкәр, хәйләле; **хи́трый челове́к** хәйләкәр кеше; **хи́трые глаза́** хәйләле күҙҙәр; **хи́трый взгляд** мут ҡараш **2.** (*замысловатый*) башватҡыс, хикмәтле; **хи́трый вопро́с** башватҡыс һорау

**ХИ-ХИ́** *межд.* һи-һи (*көлөү*)

**ХИХИ́КАНЬЕ** *с см.* **хихи́кать**

**ХИХИ́КАТЬ** *несов.*; *разг.* хихылдау; **хихи́кать без вся́кой причи́ны** бер сәбәпһеҙ хихылдау

**ХИХИ́КНУТЬ** *сов.* хихылдап ҡуйыу

**ХИЩЕ́НИЕ** *с* урлау, уғрылыҡ; **ме́лкое хище́ние** ваҡ уғрылыҡ

**ХИ́ЩНИК** *м* и **ХИ́ЩНИЦА** *ж* **1.** йыртҡыс йәнлек; **матёрый хи́щник** усал йыртҡыс **2.** *перен.* йыртҡыс, талаусы (*кеше*)

**ХИ́ЩНИЧАТЬ** *несов.* **1.** (*о животных, птицах*) йыртҡысланыу, аяуһыҙланыу **2.** йыртҡыстарса эш итеү

**ХИ́ЩНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** йыртҡыс(тар) ...ы, йыртҡыстарса; **хи́щнические пова́дки** йыртҡыс ҡылыҡтары **2.** вәхшиҙәрсә, йыртҡыстарса; **хи́щническая вы́рубка ле́са** урманды вәхшиҙәрсә ҡырҡыу; **хи́щнический лов ры́бы** балыҡты йыртҡыстарса тотоу

**ХИ́ЩНИЧЕСТВО** *с* **1.** йыртҡыслыҡ **2.** *перен.* йыртҡыслыҡ, вәхшилек; **занима́ться хи́щничеством** вәхшилек ҡылыу

**ХИ́ЩНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йыртҡыс; **хи́щный зверь** йыртҡыс йәнлек **2.** *перен.* йыртҡыс(тарса), ҡырағай, ҡомһоҙ; **хи́щный взгляд** ҡомһоҙ ҡараш

**ХЛАДНОКРО́ВИЕ** *с* һалҡын ҡанлылыҡ, һалҡынлыҡ, тыныс тәбиғәтлелек, баҫалҡылыҡ; **не теря́ть хладнокро́вия** һалҡын ҡанлылыҡты юғалтмау

**ХЛАДНОКРО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һалҡын ҡанлы, тыныс тәбиғәтле; **хладнокро́вный челове́к** тыныс тәбиғәтле кеше **2.** һалҡын, тотанаҡлы, тыныс; **хладнокро́вный отве́т** тотанаҡлы яуап

**ХЛАДОСТО́ЙКОСТЬ** *ж* һалҡынға сыҙамлылыҡ

**ХЛАМ** *м собир.* иҫке-моҫҡо, алам-һалам, сүпсар; **вы́бросить хлам** иҫке-моҫҡоно сығарып ташлау

**ХЛАМИ́ДА** *ж* хламида (**1.** *тар.* *боронғо римляндарҙа, гректарҙа оҙон кейем* **2.** *һөйл. килешһеҙ* (*оҙон, киң*) *кейем*)

**ХЛЕБ** *м* **1.** икмәк; **ржано́й хлеб** арыш икмәге; **ко́рка хле́ба** икмәк ҡатыһы; **печь хлеб** икмәк бешереү **2.** (*зерно*) ашлыҡ, иген; **жать хлеб** ашлыҡ урыу; **сдава́ть хлеб** иген тапшырыу **3.** *перен.*, *разг.* ашарлыҡ, туйымлыҡ, ризыҡ, икмәк-тоҙлоҡ; **зараба́тывать себе́ на хлеб** үҙенә ашарлыҡ эшләү ♦ **и то́ хлеб** юҡ тигәнсе, ярап тора; **хле́б-**

**со́ль**: 1) (*угощение*) һый-хөрмәт; 2) (*забота*) хәстәр, ҡайғыртыу; **хле́бом не корми́** *см.* **корми́ть**; **хлеб насу́щный** йәшәү, тереклек итеү өсөн кәрәкле нәмәләр; көндәлек икмәк; **хлеб да соль**; **хле́б-со́ль**; **хлеб и соль** ашығыҙ тәмле булһын

**ХЛЕБА́ТЬ** *несов. что* и *без доп.* **1.** *разг.* (*пить большими глотками*) һемереү, һемереп (шопорлатып) эсеү **2.** *прост.* (*есть жидкое*) ашау, эсеү; **хлеба́ть суп** өйрә эсеү

**ХЛЕ́БЕЦ** *м* күмәс, (бәләкәй) икмәк; **хрустя́щие хле́бцы** көтөрләп торған бәләкәй икмәк

**ХЛЕ́БИНА** *ж*; *пчел.* манса, һитә

**ХЛЕ́БНИЦА** *ж* икмәк табағы, икмәк һауыты

**ХЛЕБНУ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* **1.** *см.* **хлеба́ть** **2.** *что*, *чего*; *разг.* (*выпить*) эсеп (йотоп) ебәреү, эсеү; (*выпить спиртное*) төшөрөп алыу **3.** *чего*; *перен.*, *разг.* (*испытать*) баштан үткәреү (кисереү), кисереү, күреү; **хлебну́ть го́ря** ҡайғы күреү, ҡайғы-хәсрәт кисереү

**ХЛЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** икмәк ...ы; **хле́бные кро́шки** икмәк валсыҡтары; **хле́бный квас** икмәк кеүәҫе **2.** ашлыҡ ...ы, иген ...ы; **хле́бная торго́вля** ашлыҡ сауҙаһы; **хле́бные всхо́ды** иген шытымдары **3.** (*урожайный*) ашлыҡлы, икмәкле, игенле; **хле́бные края́** игенле яҡтар **4.** *перен.*, *разг.* (*выгодный*) файҙалы, табышлы, төшөмлө; **хле́бное месте́чко** төшөмлө урын

**ХЛЕБО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "икмәк", "иген", "ашлыҡ" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **хлебозаво́д** икмәк заводы; **хлебосда́ча** ашлыҡ тапшырыу

**ХЛЕБОБУ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое икмәк-күмәс ...ы, икмәк-ҡалас ...ы; **хлебобу́лочный магази́н** икмәк-ҡалас магазины

**ХЛЕБОЗАВО́Д** *м* икмәк заводы

**ХЛЕБОЗАГОТОВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое иген (ашлыҡ) әҙерләү ...ы; **хлебозаготови́тельная кампа́ния** иген әҙерләү кампанияһы

**ХЛЕБОЗАГОТО́ВКИ** *мн.* (*ед.* **хлебозаготовка** *ж*) иген әҙерләү

**ХЛЕБОПА́ШЕСТВО** *с* игенселек, иген игеү; **занима́ться хлебопа́шеством** иген игеү менән шөғөлләнеү

**ХЛЕБОПА́ШЕЦ** *м* игенсе, иген игеүсе

**ХЛЕБОПЁК** *м см.* **пе́карь**

**ХЛЕБОПЕКА́РНЫЙ,** -ая, -ое икмәк бешереү ...ы; **хлебопека́рная промы́шленность** икмәк бешереү сәнәғәте

**ХЛЕБОПЕКА́РНЯ** *ж см.* **пека́рня**

**ХЛЕБОПЕЧЕ́НИЕ** *с* икмәк бешереү

**ХЛЕБОПРОДУ́КТЫ** *мн.* (*ед.* **хлебопроду́кт** *м*) ашлыҡ продукттары

**ХЛЕБОПРОИЗВОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее ашлыҡ бирә (үҫтерә) торған; **хлебопроизводя́щий райо́н** ашлыҡ үҫтерә торған төбәк (район)

**ХЛЕБОРЕ́З** *м* икмәк телеүсе (ҡырҡыусы)

**ХЛЕБОРЕ́ЗКА** *ж* **1.** икмәк телгес (*ҡулайлама*) **2.** *см.* **хлеборе́з**

**ХЛЕБОРЕ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое икмәк телеү (ҡырҡыу) ...ы, икмәк телә (ҡырҡа) торған; **хлеборе́зный нож** икмәк телә торған бысаҡ

**ХЛЕБОРО́Б** *м см.* **хлебопа́шец**; **хлеборо́бы райо́на** район(дың) игенселәре

**ХЛЕБОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое иген үҫә (уңа) торған, иген уңған, ашлыҡлы, уңышлы; **хлеборо́дный год** иген уңған йыл

**ХЛЕБОСДА́ТЧИК** *м* ашлыҡ (иген) тапшырыусы

**ХЛЕБОСДА́ЧА** *ж* ашлыҡ (иген) тапшырыу; **план хлебосда́чи** ашлыҡ тапшырыу планы

**ХЛЕБОСО́Л** *м* ҡунаҡсыл (һый-хөрмәт күрһәтеүсе, йомарт) кеше

**ХЛЕБОСО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡунаҡсыл, хөрмәтсел, йомарт, һыйсыл; **хлебосо́льный хозя́ин** ҡунаҡсыл хужа

**ХЛЕБОСО́ЛЬСТВО** *с* ҡунаҡсыллыҡ, һыйсыллыҡ, йомартлыҡ, хөрмәт күрһәтеү

**ХЛЕБОУБО́РКА** *ж* иген (ашлыҡ) йыйыу (урыу, урып йыйыу)

**ХЛЕБОУБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое иген йыйыу ...ы, иген урыу ...ы; **хлебоубо́рочная маши́на** иген йыйыу машинаһы

**ХЛЕВ** *м* аҙбар, һарай, ҡура

**ХЛЕСТАКО́ВЩИНА** *ж* үтә шапырыныусанлыҡ, ҡупырайыусанлыҡ

**ХЛЕСТАНУ́ТЬ** *сов. см.* **хлеста́ть**

**ХЛЕСТА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что*, *по чему* сыптырыу, сыбыртҡылау, һуғыу, һуғып алыу, һыҙырып ебәреү, һыҙыра (яндыра) тартыу, һыҙырыу; (*веником*) сабыныу, сабыу; **хлеста́ть ло́шадь** атты сыбыртҡылау; **хлеста́ть пру́тиком** сыбыҡ менән сыптырыу **2.** *во что* бәреү, һыҙырыу; **дождь хле́щет в окно́** ямғыр тәҙрәгә бәрә **3.** (*о волнах*) тулҡынланыу **4.** сорлау, сорлап ағыу, шабырлап ағыу; **вода́ хле́щет из кра́на** һемәктән һыу шабырлап аға

**ХЛЁСТКИЙ,** -ая, -ое **1.** шыйыҡ, һыйғыр, әсе; **хлёсткий пру́тик** һыйғыр сыбыҡ; **хлёсткий ве́тер** әсе ел **2.** *перен.*, *разг.* (*резкий*, *меткий*) әсе, үткер

**ХЛЕСТНУ́ТЬ** *сов. см.* **хлеста́ть**; **хлестну́ть пле́тью** ҡамсы менән һыҙыра тартыу

**ХЛИ́ПКИЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*непрочный*, *некрепкий*) ныҡ булмаған, бушаҡ **2.** *перен.* (*слабый*) хәлһеҙ, кәрһеҙ, насар; **хли́пкое здоро́вье** насар сәләмәтлек **3.** (*о человеке*) майрыҡ, былҡы, хәлһеҙ, кәрһеҙ; **хли́пкий челове́к** кәрһеҙ кеше **4.** (*разжиженный*) шыйыҡ; **хли́пкая грязь** шыйыҡ батҡаҡ

**ХЛОП I** *межд. в знач. сказ.*; *разг.* **1.** шап итеү, шап итеп һуғыу; **он хлоп кулако́м по́ столу** ул йоҙроғо менән өҫтәлгә шап итеп һуҡты **2.** лөп, дөп, шап (*о внезапном действии*)

**ХЛОП II** *м*; *уст.*, *прост.* (*хлопки*) бәреү (шаҡылдатыу, һуғыу, ҡул сабыу) тауышы

**ХЛО́ПАНЬЕ** *с см.* **хло́пать**

**ХЛО́ПАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **хло́пнуть** 2—4; **хло́пать по плечу́** ҡулбашына һуғыу; **хло́пать кнуто́м** сыбыртҡы шартлатыу **2.** *кому* (*рукоплескать*) ҡул сабыу, сәпәкәй итеү; **хло́пать арти́сту** артисҡа ҡул сабыу ♦ **хло́пать глаза́ми** аптырап ҡарап тороу, ауыҙ асып тороу; **хло́пать уша́ми**: 1) аңшайыу, ишеткәндә (тыңлағанда) аңламау; 2) асыҡ ауыҙланыу, ауыҙ асып тороу (ҡалыу)

**ХЛО́ПАТЬСЯ** *несов. см.* **хло́пнуться**

**ХЛО́ПЕЦ** *м*; *разг.* үҫмер

**ХЛОПКО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "мамыҡ" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **хлопкоубо́рка** мамыҡ йыйыу; **хлопкопряде́ние** мамыҡ иләү

**ХЛОПКОВО́Д** *м* мамыҡсы (*белгес*)

**ХЛОПКОВО́ДСТВО** *с* мамыҡсылыҡ, мамыҡ үҫтереү

**ХЛОПКОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое мамыҡсылыҡ ...ы; **хлопково́дческий совхо́з** мамыҡсылыҡ совхозы

**ХЛО́ПКОВЫЙ,** -ая, -ое мамыҡ ...ы; **хло́пковое ма́сло** мамыҡ майы; **хло́пковое по́ле** мамыҡ баҫыуы

**ХЛОПКООЧИСТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мамыҡ таҙарта торған; **хлопкоочисти́тельная маши́на** мамыҡ таҙарта торған машина

**ХЛОПКОПРЯДЕ́НИЕ** *с* мамыҡ иләү

**ХЛОПКОПРЯДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мамыҡ иләй торған, мамыҡ иләү ...ы; **хлопкопряди́льная маши́на** мамыҡ иләү машинаһы

**ХЛОПКОРО́Б** *м* мамыҡ үҫтереүсе, мамыҡ игеүсе, мамыҡсы

**ХЛОПКОСЕ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее мамыҡ игеүсе ...ы; **хлопкосе́ющий райо́н** мамыҡ игеүсе район

**ХЛОПКОУБО́РКА** *ж* мамыҡ йыйыу

**ХЛОПКОУБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое мамыҡ йыйыу ...ы; **хлопкоубо́рочная маши́на** мамыҡ йыйыу машинаһы

**ХЛО́ПНУТЬ** *сов.* **1.** *см.* **хло́пать** 2; **2.** *кого-что, по чему* һуғыу, һуҡҡылау, ҡаҡҡылау, (иркәләп) ҡағыу; **хло́пнуть руко́й по плечу́** ҡул менән иңбашҡа һуғыу **3.** *чем* шап иттереү, шапылдатыу; **хло́пнуть дверьми́** ишектәрҙе шап иттереп ябыу **4.** *чем* и *без доп.* шартлатыу, ҡополдатыу

**ХЛО́ПНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* лап (тып, шап) итеп ҡолап төшөү; **хло́пнуться на зе́млю** ергә лап итеп ҡолап төшөү

**ХЛО́ПОК** *м см.* **хлопча́тник**; **выра́щивать хло́пок** мамыҡ үҫтереү; **убира́ть хло́пок** мамыҡ йыйыу

**ХЛОПО́К** *м* **1.** (*звук*) һуғыу (атыу) тауышы **2.** *мн.* **хлопки́** (*аплодисменты*) ҡул сабыу, сәпәкәйләү, алҡыштар

**ХЛОПОТА́ТЬ** *несов.* **1.** мәшәкәтләнеү, хәстәрләү; **хлопота́ть по до́му** өй эштәре менән мәшәкәтләнеү **2.** *о чём* юллау, ҡайғыртыу, артынан йөрөү; **хлопота́ть о путёвке в санато́рий** санаторийға путёвка юллау **3.** *за кого* (*стараться оказать содействие*) (артынан) йөрөү, үтенеп һорау, ҡайғыртыу

**ХЛОПОТЛИ́ВОСТЬ** *ж* **1.** мәшәкәт, ҡайғыртыусанлыҡ, хәстәрлелек; **проявля́ть изли́шнюю хлопотли́вость** артыҡ мәшәкәт күрһәтеү **2.** мәшәкәтлелек; **хлопотли́вость де́ла** эштең мәшәкәтлелеге

**ХЛОПОТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәшәкәтле, ығы-зығылы; **хлопотли́вое де́ло** мәшәкәтле эш **2.** (*суетливый*) тынғыһыҙ, ҡайғыртыусан; **хлопотли́вый хозя́ин** тынғыһыҙ хужа

**ХЛО́ПОТНО** *нареч. в знач. сказ.*; *разг.* мәшәкәтле; **э́то о́чень хло́потно** был бик мәшәкәтле

**ХЛО́ПОТНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* мәшәкәтле, ауыр, ҡатмарлы; **хло́потное де́ло** мәшәкәтле эш

**ХЛО́ПОТЫ** *только мн.* мәшәкәт, ҡамасау(лыҡ); **создава́ть хло́поты** ҡамасаулыҡ яһау; **жите́йские хло́поты** донъя мәшәкәттәре ♦ **хлопо́т по́лон рот** *см.* **рот**

**ХЛОПУ́ШКА** *ж* **1.** (*для уничтожения мух*) себен үлтергес **2.** (*игрушка*) шапылдатҡыс **3.** *бот.* (*сорняк*) шәфәкгөл **4.** *тех.* (*самозакрывающаяся заслонка в трубопроводах*) шапылдатҡыс

**ХЛОПЧА́ТНИК** *м* мамыҡ, мамыҡ үләне, пахта

**ХЛОПЧАТОБУМА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кизе-мамыҡ ...ы; **хлопчатобума́жная промы́шленность** кизе-мамыҡ сәнәғәте **2.** кизе-мамыҡтан, кизе-мамыҡ; **хлопчатобума́жная ткань** кизе-мамыҡ туҡыма

**ХЛО́ПЬЯ** *только мн.* киҫәк, йомғаҡ, ялбыр, ябалаҡ; **сне́жные хло́пья** ябалаҡ ҡар

**ХЛОР** *м* хлор (*химик элемент, йәшкелт-һары төҫтәге тонсоҡторғос газ*)

**ХЛОРЕ́ЛЛА** *ж* хлорелла (*бер күҙәнәкле бик ваҡ йәшел ылымыҡ*)

**ХЛОРИ́РОВАНИЕ** *с см.* **хлори́ровать**

**ХЛОРИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **хлори́ровать 2.** *прил.* хлорланған; **хлори́рованная вода́** хлорланған һыу

**ХЛОРИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** (*очистить воду хлором*) хлорлау, хлор ҡатнаштырыу; **хлори́ровать во́ду** һыуҙы хлорлау **2.** (*ввести хлор в молекулы органического вещества*) хлор ҡушыу

**ХЛО́РИСТЫЙ,** -ая, -ое хлорлы, хлор ҡатнаштырылған; **хло́ристый на́трий** хлорлы натрий

**ХЛО́РНЫЙ,** -ая, -ое хлор ...ы, хлорлы; **хло́рная кислота́** хлор кислотаһы; **хло́рная и́звесть** хлорлы эзбиз

**ХЛОРО́З** *м*; *спец.* хлороз (**1.** *бот. тупраҡта тимер тоҙҙары етешмәүҙән үҫемлектәрҙә була торған ауырыу* **2.** *ҡан аҙлыҡтан ағарыныу*)

**ХЛОРОФИ́ЛЛ** *м* хлорофилл (*үҫемлектәргә йәшел төҫ бирә торған пигмент*)

**ХЛОРОФИ́ЛЛОВЫЙ,** -ая, -ое хлорофилл ...ы; **хлорофи́лловые зёрна** хлорофилл бөртөктәре

**ХЛОРОФО́РМ** *м* хлороформ (*тиҙ осоп бөтөүсән төҫһеҙ шыйыҡлыҡ*)

**ХЛОРОФО́С** *м* хлорофос (*короткос бөжәктәргә ҡаршы ҡулланылған химик препарат*)

**ХЛЫ́НУТЬ** *сов.* **1.** сорлап ағыу (аға башлау), ҡойоп яуыу, эркелеү; **слёзы хлы́нули из глаз** күҙҙән йәш сорлап аҡты **2.** (*двинуться во множестве*) ябырылыу, ағылыу; **хлы́нула толпа́ люде́й** кешеләр төркөмө ағылды

**ХЛЫСТ** *м* **1.** (*прут*) шыйыҡ (һыйғыр) сыбыҡ; **уда́рить хлысто́м** шыйыҡ сыбыҡ менән һуғыу **2.** (*плётка*) сыбыртҡы, ҡамсы **3.** *спец.* (*ствол поваленного дерева, очищенный от сучьев*) буй (оҙон) ағас; **трелева́ть хлысты́** буй ағас һөйрәтеү

**ХЛЫ́СТИК** *м* **1.** (*прутик*) бәләкәй сыбыҡ **2.** (*небольшая плётка*) бәләкәй сыбыртҡы

**ХЛЫЩ** *м*; *разг.*, *неодобр.* фырт егет

**ХЛЮ́ПАНЬЕ** *с*; *разг. см.* **хлю́пать**

**ХЛЮ́ПАТЬ** *несов.* **1.** *разг.* (*чавкать — о воде, грязи*) ласҡылдау, лыстырлау, сапылдау; **грязь хлю́пает под нога́ми** аяҡ аҫтында бысраҡ ласҡылдап ята **2.** *прост.* (*идти по чему-л. жидкому, вязкому*) лыстырлатып баҫыу, лас-лос атлау; **хлю́пать по лу́жам** күләүектән лас-лос атлау **3.** *прост.* (*плакать*) һыңҡылдау, мышҡылдау ♦ **хлю́пать но́сом** *прост.* мыш-мыш килеү, мышҡылдау

**ХЛЮ́ПАТЬСЯ** *несов. см.* **хлю́пнуться**

**ХЛЮ́ПИК** *м*; *прост.* мөштөм (ихтыярһыҙ) кеше, йомшаҡ кеше

**ХЛЮ́ПКИЙ,** -ая, -ое *прост.* **1.** (*жидкий, вязкий*) ебеткәк, батҡаҡ, лысҡылдап торған; **хлю́пкая грязь** лысҡылдап торған бысраҡ **2.** *перен.* ебегән, ихтыярһыҙ; **хлю́пкий челове́к** ебегән кеше

**ХЛЮ́ПНУТЬ** *сов. см.* **хлю́пать** 1, 2

**ХЛЮ́ПНУТЬСЯ** *сов.*; *прост.* батҡаҡҡа ҡолау (йығылыу, төшөү), шап итеп ҡалыу

**ХЛЮСТ** *м*; *прост.* мут кеше

**ХЛЯБЬ** *ж* **1.** *уст.* (*бездна, глубина*) упҡын, сөмгөл **2.** *разг.* (*жидкая грязь*) батҡаҡ, батҡыл ер (урын) ♦ **разве́рзлись хля́би небе́сные** *шутл.* күктең төбө тишелгән (*туктауһыҙ ямғыр яуыуы*)

**ХЛЯ́СТИК** *м* биллек

**ХМ** *межд.* һе, һем

**ХМЕЛЕВО́Д** *м* ҡомалаҡ үҫтереүсе (*белгес*)

**ХМЕЛЕВО́ДСТВО** *с* ҡомалаҡ үҫтереү (етештереү), ҡомалаҡ үҫтереүселек

**ХМЕЛЕВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ҡомалаҡ үҫтереү (етештереү) …ы; **хмелево́дческий совхо́з** ҡомалаҡ үҫтереү совхозы

**ХМЕЛЕВО́Й,** -ая, -ое ҡомалаҡ …ы; **хмелево́й за́пах** ҡомалаҡ еҫе; **хмелевы́е дро́жжи** ҡомалаҡ әсеткеһе; **хмелева́я ши́шка** ҡомалаҡ тубырсығы

**ХМЕЛЁК** *м*; *разг.*, *ласк. от* **хмель** 1 ♦ **под хмелько́м (быть)** ҡыҙмаса (булыу), еңелсә иҫереү

**ХМЕЛЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* иҫереү, башҡа китеү

**ХМЕЛЬ** *м* **1.** *бот.* (*растение и соцветия этого растения*) ҡомалаҡ; **собира́ть хмель** ҡомалаҡ йыйыу; **суши́ть хмель** ҡомалаҡ киптереү **2.** (*состояние опьянения*) иҫереү, иҫереклек ♦ **во хмелю́**; **под хме́лем** ҡыҙмаса, еңелсә иҫереү

**ХМЕ́ЛЬНИК** *м* ҡомалаҡлыҡ

**ХМЕЛЬНО́Й** и *уст.* **ХМЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*нетрезвый*) иҫерек, ҡыҙмаса; **хмельно́й челове́к** иҫерек кеше **2.** (*опьяняющий*) иҫерткес, иҫертә торған; **хмельны́е напи́тки** иҫерткес эсемлектәр **3.** *в знач. сущ.* **хмельно́е** *с* иҫерткес эсемлек, мәй

**ХМУ́РИТЬ** *несов.* (*о бровях*) йыйырыу; (*о лице*) сырайҙы һытыу (боҙоу), төмһәйеү

**ХМУ́РЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡараңғы сырайлы, бойоҡ, һытыҡ йөҙлө (сырайлы); **хму́рый челове́к** ҡараңғы сырайлы кеше **2.** *перен.* (*пасмурный*) йонсоу, болотло; **хму́рое не́бо** болотло күк; **хму́рое у́тро** йонсоу иртә

**ХМЫ́КАТЬ** *несов.*; *разг.* "һем-һем" ("һе") тиеү (*аптырағанда, мыҫҡыллағанда, ғәрләнгәндә*)

**ХМЫ́КНУТЬ** *сов. см.* **хмы́кать**

**ХНА** *ж* ҡына (*күп йыллыҡ үҫемлек һәм һарғылт ҡыҙыл буяу*)

**ХНЫ: хоть бы хны**: 1) бар тип тә белмәй, иҫе лә китмәй; 2) *кому* беште ни ҙә төштө ни, булды ни ҙә булманы ни

**ХНЫ́КАНЬЕ** *с*; *разг. см.* **хны́кать**

**ХНЫ́КАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** (*плакать*) һыңҡылдау, шыңшыу; **ребёнок хны́чет** бала һыңҡылдай **2.** *перен.* (*жаловаться*) мыжыу, зарланыу

**ХО́ББИ** *с нескл.* хобби

**ХО́БОТ** *м* **1.** томшоҡ, морон; **хо́бот слона́** фил томшоғо **2.** *воен.* хобот (*туп йәки пулемёт лафетының өҫкө өлөшө*)

**ХОБОТНО́Й** и **ХО́БОТНЫЙ,** -ая, -ое *зоол.* **1.** томшоҡло, моронло **2.** *в знач. сущ.* **хоботны́е** *мн.* томшоҡлолар

**ХОБОТО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **хо́бот** 1; **2.** *зоол.* томшоҡ, моронса

**ХОД** *м* **1.** (*движение*) йөрөш, йөрөм, аҙым, барыу, юл; (*массовое перемещение рыбы в места нереста*) үрләү ваҡыты; **весе́нний ход ры́бы** балыҡтың яҙғы үрләү ваҡыты; **ход маши́ны** машина йөрөшө; **уско́рить ход** йөрөштө тиҙләтеү; **заме́длить ход** йөрөштө әкренәйтеү; **ход ло́шади** ат аҙымы; **дать за́дний ход** артҡа йөрөш; **час хо́ду** бер сәғәтлек юл **2.** *перен.* (*течение, развитие чего-л.*) барыш, үҫеш, ағыш; **ход собы́тий** ваҡиғалар ағышы; **в хо́де борьбы́** көрәш барышында **3.** (*вход*) юл, барыу юлы, инеү (юлы); **ход со двора́** инеү ихатанан **4.** (*рабочая часть машины и др.*) тәгәрмәс, табан, ҡуласа; **колёсный ход теле́ги** арба тәгәрмәсе; **теле́га на желе́зном ходу́** тимер табанлы арба **5.** (*в игре*) сығыу, йөрөү, сығыш; **чей ход?** кем сыға?; **ход ферзём** ферзь менән йөрөү **6.** *тех.* (*работа машины, механизма*) эшләү, барыу, йөрөш; **ход часо́в** сәғәт йөрөшө; **пла́вный ход мото́ра** моторҙың талғын эшләүе **7.** *перен.* (*манёвр, приём*) алым, ысул, юл; **дипломати́ческий ход** дипломатик алым **8.** (*коридор, тоннель*) үткәүел, үтеү урыны (юлы); **подзе́мный ход** ер аҫтынан үтеү урыны

♦ **знать все хо́ды и вы́ходы** *см.* **вы́ход**; **на ходу́**: 1) эшкә әҙер; 2) барғанда, юл ыңғайында; **свои́м хо́дом идти́** үҙ йүнәлеше (ағышы) менән барыу; **не дать хо́ду** *кому кемгә* юл бирмәү, ҡаршы төшөү; **пусти́ть в ход** ҡуллана (файҙалана) башлау; **с хо́ду**: 1) барышлай, туҡтап тормай; 2) шунда уҡ; **быть в ходу́** һорау ҙур булыу, ҡулланыуҙа (файҙаланыуҙа) булыу

**ХОДА́ТАЙ** *м*; *уст.* **1.** (*защитник*) юллаусы, яҡлаусы; **быть хода́таем** юллаусы булып йөрөү **2.** (*поверенный по чьим-л. делам*) вәкил, ышанyслы кеше, вәкәләтле кеше

**ХОДА́ТАЙСТВО** *с* **1.** *см.* **хода́тайствовать 2.** (*документ*) үтенес, үтенес ҡағыҙы; **удовлетвори́ть хода́тайство** үтенесте ҡәнәғәтләндереү

**ХОДА́ТАЙСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** *о ком-чём, за кого-что* артынан йөрөү, юллау, һорау **2.** *уст.* (*быть профессиональным поверенным*) вәкил (ышаныслы кеше, вәкәләтле кеше) булыу

**ХО́ДИКИ** *только мн.*; *разг.* герле сәғәт

**ХОДИ́ТЬ** *несов.* **1.** йөрөү, барыу; **ходи́ть пешко́м** йәйәү йөрөү; **ходи́ть без це́ли** тик йөрөү; **ходи́ть на четвере́ньках** имгәкләп йөрөү **2.** (*носить какую-л. одежду, обувь и т.д.*) кейеп) йөрөү; **ходи́ть в пальто́** пальто кейеп йөрөү; **ходи́ть босико́м** ялан аяҡ йөрөү **3.** йөрөү, ҡыҙырыу; **ходи́ть по магази́нам** магазиндар буйлап йөрөү **4.** (*посещать*) (барып) йөрөү, килеү; **ходи́ть в теа́тр** театрға йөрөү **5.** (*о средствах транспорта*) йөрөү; **поезда́ хо́дят по расписа́нию** поездар расписание буйынса йөрөй **6.** (*быстро двигаться по поверхности*) шыуып тороу, шыуыу; **рука́ хо́дит по холсту́** ҡул туҡыманан шыуып тора **7.** (*колыхаться, дрожать*) сайҡалыу, һелкенеү; **пол хо́дит под нога́ми** аяҡ аҫтында иҙән һелкенә **8.** *за кем-чем* (*заботиться*) ҡарау; **ходи́ть за больны́м** ауырыуҙы ҡарау **9.** (*о часах*) йөрөү; **часы́ хо́дят** сәғәт йөрөй **10.** (*быть в употреблении*) баһаланыу, ҡулланыуҙа булыу, йөрөү; **меха́ ходи́ли вме́сто де́нег** аҡса урынына йәнлек тиреләре йөрөгән **11.** *разг.* (*быть кем-л.*) булып йөрөү (тороу, эшләү); **ходи́ть в председа́телях** рәйес булып йөрөү **12.** (*в игре*) йөрөү, сығыу; **ходи́ть пе́шкой** пешка менән йөрөү **13.** *на кого* (*охотиться*) йөрөү, барыу; **ходи́ть на медве́дя** айыуға йөрөү; **ходи́ть на охо́ту** һунарға йөрөү **14.** йөрөү, таралыу; **ходи́ть по рука́м** ҡулдан-ҡулға йөрөү; **хо́дит слух** һүҙ йөрөй **15.** *разг.* (*испражняться*) тышҡа сығыу ♦ **ходи́ть на за́дних ла́пках** *см.* **ла́пка**; **ходи́ть по́ миру** хәйер һорашыу; **ходи́ть на голове́** *см.* **голова́**; **ходи́ть по стру́нке** *см.* **стру́нка**

**ХО́ДКИЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** алымлы, атламлы, аҙымлы, йөрөмлө, йөрөшлө, үрсел; **хо́дкая ло́шадь** алымлы ат **2.** (*о товаре*) үтемле

**ХОДОВО́Й,** -ая, -ое **1.** *тех.* йөрөткөс, йөрөтөү (йөрөү) ...ы; **ходово́й винт** йөрөткөс винт; **ходово́й механи́зм** йөрөтөү механизмы **2.** *спец.* йөрөш ...ы, осош ...ы; **ходовы́е ка́чества автомоби́ля** автомобилдең йөрөш сифаттары **3.** *разг.* (*имеющий наибольший спрос*) үтемле; **ходова́я маши́на** үтемле машина **4.** (*часто употребляемый*) йыш (һәр ваҡыт) ҡулланыла торған; **ходово́е выраже́ние** һәр ваҡыт ҡулланыла торған әйтем

**ХОДО́К** *м* **1.** (*пешеход*) йәйәүле, йәйәү кеше, йәйәү йөрөүсе **2.** *уст.* (*выборное лицо*) йөргәнсә, йөрөксә, юллап йөрөүсе; **отпра́вить ходоко́в** йөргәнсәләр ебәреү

**ХОДУ́ЛИ** *мн.* (*ед.* **ходу́ля** *ж*) оҙон ағас аяҡ, ҡолға аяҡ; **ходи́ть на ходу́лях** оҙон ағас аяҡта йөрөү

**ХОДУ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* яһалма, насар, тәбиғи булмаған; **ходу́льное выраже́ние** яһалма һүҙ

**ХОДУ́Н** *м*; *разг. см.* **ходо́к** 1 ♦ **ходуно́м ходи́ть**: 1) дер һелкенеү, тетрәү, ҡалтырау; 2) ҡайнашыу, ығы-зығы килеү, баш түбән йөрөү

**ХОДЬБА́** *ж* йөрөш, йөрөү, юл; **уста́ть от ходьбы́** йөрөүҙән (йөрөп) арыу; **по́лчаса ходьбы́** ярты сәғәтлек юл

**ХОДЯ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** *разг.* йөрөй (ала) торған; **ходя́чая больна́я** йөрөй ала торған ауырыу **2.** (*обычный*) киң таралған, киң (йыш) ҡулланылған (ҡулланышлы); **ходя́чее выраже́ние** киң таралған әйтем **3.** *перен., ирон.* торғаны менән (бер), аяҡлы; **ходя́чая доброде́тель** торғаны бер изге йән ♦ **ходя́чая энциклопе́дия** *см.* **энциклопе́дия**

**ХОЖДЕ́НИЕ** *с см.* **ходи́ть** 1, 3, 5, 13; **хожде́ние по го́роду** ҡала буйлап йөрөү; **хожде́ние взад-вперёд** алға-артҡа йөрөп тороу **2.** (*жанр древнерусской литературы, представляющий собой описание путешествий*) сәйәхәтнамә ♦ **име́ть хожде́ние** йөрөү, ҡулланыу; **хожде́ние по му́кам** яфа сигеү, ғазаплы тормош

**ХОЗРАСЧЁТ** *м* (*хозяйственный расчёт*) хозрасчёт, хужалыҡ иҫәбе (*үҙ сығымын үҙе ҡаплау нигеҙендә ҡоролған планлы хужалыҡ итеү*)

**ХОЗРАСЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое хужалыҡ иҫәбендәге, хужалыҡ иҫәбе ...ы; **хозрасчётное предприя́тие** хужалыҡ иҫәбендәге предприятие

**ХОЗЯ́ИН** *м* **1.** *в разн. знач.* хужа, эйә; **хозя́ин до́ма** өй хужаһы; **стать хозя́ином** эйә булыу; **находи́ть хозя́ина** эйәһен табыу; **не име́ющий хозя́ина** эйәһеҙ **2.** *прост.* (*муж*) ир, хужа ♦ **быть хозя́ином своего́ сло́ва** үҙ һүҙендә тороу

**ХОЗЯ́ЙКА** *ж* **1.** хужа, хужабикә **2.** *прост.* (*жена*) ҡатын, хужабикә ♦ **дома́шняя хозя́йка** хужабикә; **сестра́-хозя́йка** сестра-хозяйка (*хәстәханала, балалар баҡсаһында һ.б. хужалыҡ эшен алып барған ҡатын-ҡыҙ*)

**ХОЗЯ́ЙНИЧАТЬ** *несов.* **1.** (*вести хозяйство*) хужалыҡ итеү, йорт ҡарау, хужалыҡ алып барыу, хужа булып тороу **2.** (*бесцеремонно распоряжаться*) хужа булыу, үҙе теләгәнсә эшләү; **хозя́йничать в чужо́м до́ме** кеше өйөндә хужа булыу

**ХОЗЯ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое **1.** хужа ...ы; **хозя́йская дочь** хужа ҡыҙы **2.** хужаларса, хужа кеүек; **хозя́йское отноше́ние к де́лу** эшкә хужаларса мөнәсәбәт ♦ **де́ло хозя́йское** *разг.* үҙең беләһең, үҙең теләгәнсә эшлә

**ХОЗЯ́ЙСТВЕННИК** *м* хужалыҡ итеүсе, хужалыҡ кешеһе, хужалыҡсан

**ХОЗЯ́ЙСТВЕННОСТЬ** *ж* хужалыҡсыллыҡ, тернәкселлек, һаҡсыллыҡ; **прояви́ть хозя́йственность** һаҡсыллыҡ күрһәтеү

**ХОЗЯ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** хужалыҡ ...ы; **хозя́йственный год** хужалыҡ йылы; **хозя́йственный инвента́рь** хужалыҡ кәрәк-яраҡтары **2.** хужалыҡсыл, йүнсел, һаҡсыл, донъясыл; **хозя́йственный челове́к** хужалыҡсыл кеше; **быть хозя́йственным** донъясыл булыу **3.** (*рациональный, безубыточный*) һаҡсыл, сығымһыҙ **4.** (*властный*) хужаларса, хужаларға хас; **хозя́йственный тон** хужаларға хас тон ♦ **хозя́йственное мы́ло** кер һабыны

**ХОЗЯ́ЙСТВО** *с* **1.** *в разн. знач.* хужалыҡ, донъя; **наро́дное хозя́йство** халыҡ хужалығы; **се́льское хозя́йство** ауыл хужалығы; **единоли́чное хозя́йство** яңғыҙаҡ хужалыҡ; **ры́бное хозя́йство** балыҡсылыҡ хужалығы; **вести́ хозя́йство** хужалыҡ итеү; **нала́дить хозя́йство** донъя бөтәйтеү; **разбаза́ривать хозя́йство** донъя туҙҙырыу **2.** (*предметы быта*) өй (йорт) әйберҙәре, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары

**ХОЗЯ́ЙСТВОВАТЬ** *несов.* хужалыҡ итеү, хужалыҡты алып барыу

**ХОККЕ́ЙСТ** *м* хоккейсы

**ХОККЕ́Й** *м* хоккей; (*на льду*) боҙҙағы хоккей; (*с шайбой*) шайбалы хоккей; (*на траве*) сәкән хоккей; **игра́ть в хокке́й** сәкән һуғыу

**ХОККЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое хоккей ...ы; **хокке́йный матч** хоккей ярышы; **хокке́йная кома́нда** хоккей командаһы

**ХО́ЛЕНЫЙ** и **ХОЛЁНЫЙ,** -ая, -ое иркә, наҙлы, үтә йомшаҡ; **холёный челове́к** наҙлы кеше; **хо́леные ру́ки** үтә йомшаҡ ҡулдар

**ХОЛЕ́РА** *ж* ваба, холера; **зарази́ться холе́рой** ваба йоҡтороу

**ХОЛЕ́РИК** *м* холерик (*ҡыҙыу тәбиғәтле кеше*)

**ХОЛЕРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое холерик, ҡыҙыу, холерикка хас; **холери́ческий темпера́мент** холерик темперамент

**ХОЛЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ваба ...ы, вабалы, холералы, холера ...ы; **холе́рные микро́бы** ваба микробтары; **холе́рный год** ваба йылы **2.** *в знач. сущ.* **холе́рный** *м* и **холе́рная** *ж* (*заболевший холерой*) ваба менән ауырыусы

**ХОЛЕСТЕРИ́Н** *м*; *биол.* холестерин (*организмда күҙәнәк мембранаһы составындағы юғары май кислоталары менән ҡатмарлы эфирҙар барлыҡҡа килтереүсе органик матдә*)

**ХОЛЕЦИСТИ́Т** *м*; *мед.* холецистит (*үт ҡыуығының шешеүе*)

**ХО́ЛИТЬ** *несов. кого-что* иркәләп (яҡшы итеп) тотоу (тәрбиәләү, ҡарау), наҙлау; **хо́лить ло́шадь** атты иркәләп ҡарау

**ХО́ЛКА** *ж* мунда, һауры; **ло́шадь с высо́кой хо́лкой** бейек мундалы ат

**ХОЛЛ** *м* холл (*ҡунаҡханала, театрҙа, кинола һ.б. көтөү, ял итеү залы*)

**ХОЛМ** *м* уба, ҡалҡыулыҡ, түмәләс; **верши́на холма́** уба түбәһе; **взбира́ться на холм** түмәләскә үрләү

**ХО́ЛМИК** *м* уба(л)сыҡ, бәләкәй ҡалҡыулыҡ

**ХОЛМИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ҡалҡыулы, түбәле, убалы, убалсыҡлы; **холми́стая ме́стность** убалы ер

**ХОЛМИ́ТЬСЯ** *несов.* ҡалҡып тороу, убаланып ятыу, убалсыҡланыу

**ХО́ЛОД** *м* **1.** һыуыҡ, һалҡын, һыуыҡлыҡ; **зи́мний хо́лод** ҡышҡы һыуыҡ; **вы́нести на хо́лод** һалҡынға сығарыу **2.** *мн.* **холода́** (*о погоде*) һыуыҡ ваҡыт, һалҡын (һыуыҡ) көндәр, һыуыҡтар, һалҡындар; **начали́сь холода́** һалҡындар башланды; **осе́нние холода́** көҙгө һыуыҡ көндәр **3.** (*ощущение озноба*) өшөтөү, һыуыныу; **броса́ет то в жар, то в хо́лод** бер ҡыҙҙыра, бер өшөтә **4.** *перен.* (*равнодушие*) һалҡынлыҡ, һалҡын ҡараш, иғтибарһыҙлыҡ; **от неё ве́ет хо́лодом** *безл.* унан һалҡынлыҡ бөркөлә

**ХОЛОДА́ТЬ** *несов.* **1.** *безл.* һалҡынайтыу, һыуытыу, һыуыта (һалҡыная) төшөү; **начина́ет холода́ть** көн һалҡынайта башланы **2.** *разг. см.* **холоде́ть** 1, 2

**ХОЛОДЕ́ТЬ** *несов.* **1.** һыуыныу, һалҡынайыу; **на у́лице холоде́ет** *безл.* тышта һалҡыная **2.** һыуыныу, өшөү; **ру́ки холоде́ют на моро́зе** һалҡында ҡулдар өшөй **3.** эҫеле-һыуыҡлы булып китеү, ҡурҡыу, ҡот осоу; **холоде́ть от у́жаса** ныҡ ҡурҡыуҙан эҫеле-һыуыҡлы булып китеү

**ХОЛОДЕ́Ц** *м* ҡойҡа, тертелдәк (*ашамлыҡ*)

**ХОЛОДИ́ЛЬНИК** *м* һыуытҡыс; **храни́ть мя́со в холоди́льнике** итте һыуытҡыста һаҡлау

**ХОЛОДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һыуытҡыс, һыуытыу ...ы; **холоди́льная аппарату́ра** һыуытҡыс аппаратура

**ХОЛОДИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что*; *разг.* (*охлаждать*) һыуытыу, һалҡынайтыу, өшөтөү; **се́верный ве́тер холоди́т лицо́** тиреҫ (төньяҡ) еле битте өшөтә **2.** (*освежать*) һалҡынайтыу; **мя́та холоди́т во рту́** бөтнөк ауыҙҙы һалҡынайта

**ХО́ЛОДНО 1.** *нареч.* илтифатһыҙ, һалҡын; **хо́лодно отве́тить** һалҡын яуап биреү **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* һалҡын, һыуыҡ; **сего́дня хо́лодно** бөгөн һыуыҡ; **мне хо́лодно** миңә һалҡын ♦ **ни жа́рко ни хо́лодно** *кому*, *от чего* барыбер, бер ҙә иҫ китмәү

**ХОЛОДНОКРО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *зоол.* һыуыҡ ҡанлы (*балыҡ, баҡа һ.б.*) **2.** *уст. см.* **хладнокро́вный**

**ХО́ЛОДНОСТЬ** и *уст.* **ХОЛО́ДНОСТЬ** *ж* һалҡынлыҡ, иғтибарһыҙлыҡ; **хо́лодность отноше́ний** мөнәсәбәттәрҙең һалҡынлығы

**ХОЛО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һалҡын, һыуыҡ, өшәнес; **холо́дный ве́тер** һалҡын ел; **холо́дная вода́** һыуыҡ һыу; **холо́дная о́сень** һалҡын көҙ **2.** (*об одежде*) йоҡа; **холо́дное пальто́** йоҡа пальто **3.** яғылмай (йылытылмай) торған, һалҡын; **холо́дная да́ча** йылытылмай торған дача **4.** (*остывший*) һыуыҡ; **холо́дный чай** һыуыҡ сәй **5.** *перен.* һалҡын, илтифатһыҙ; **холо́дный взгляд** һалҡын ҡараш **6.** *в знач. сущ.* **холо́дное** *с см.* **заливно́е**; **ры́бное холо́дное** балыҡ ҡойҡаһы **7.** (*находящийся в направлении к полюсу*) һалҡын; **холо́дный по́яс** һалҡын бүлкәт **8.** *перен.* (*лишённый страстности*) һалҡын, дәртһеҙ; **холо́дное се́рдце** һалҡын йөрәк **9.** (*производимый без нагревания*) ҡыҙҙырмай, һалҡын килеш; **холо́дная обрабо́тка мета́ллов** металдарҙы һалҡын килеш эшкәртеү ♦ **"холо́дная война́"** "һалҡын һуғыш"; **холо́дное ору́жие** һалҡын ҡорал

**ХОЛОДО́К** *м*; *разг.* **1.** һалҡын, еләҫ; **у́тренний холодо́к** иртәнге һалҡын **2.** һалҡынса (еләҫ) урын; **сиде́ть в холодке́** еләҫ урында ултырыу **3.** (*ощущение лёгкого озноба*) ҡалтыраныу; **по те́лу пробежа́л холодо́к** тән ҡалтыранып ҡуйҙы **4.** *перен.* (*отчуждённость, равнодушие*) ситләшеү, һалҡынлыҡ; **холодо́к в отноше́ниях** мөнәсәбәттәрҙәге һалҡынлыҡ

**ХОЛОДОСТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое һыуыҡҡа сыҙамлы, һалҡынға бирешмәүсән

**ХОЛОДОСТО́ЙКОСТЬ** *ж* һалҡынға сыҙамлыҡ

**ХОЛО́П** *м* **1.** *ист.* ҡол, холоп (*Боронғо Руста*) **2.** *уст.* холоп (*крепостной крәҫтиән, хеҙмәтсе*) **3.** *перен., презр.* (*прислужник*) ҡол, ҡуштан, ялағай

**ХОЛО́ПСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *ист., уст.* ҡолдарса, холоптарса, ҡол ...ы; **холо́пское житьё** ҡолдарса йәшәйеш **2.** *презр.* ҡуштан, ялағай, ҡол ...ы

**ХОЛО́ПСТВО** *с* **1.** *ист., уст.* (*состояние холопа*) ҡоллоҡ, холоплыҡ **2.** *собир.*; *ист., уст.* ҡолдар, холоптар **3.** *перен., презр.* (*раболепство*) ярамһаҡлыҡ, түбәнһенеү, баш эйеү

**ХОЛО́ПСТВОВАТЬ** *несов., презр.* (*раболепствовать*) ҡуштанланыу, ярамһаҡланыу

**ХОЛОСТИ́ТЬ** *несов. кого* көйҙөр(т)өү, бестереү, һылыула(ты)у; **холости́ть жеребца́** айғырҙы һылыулау

**ХОЛОСТО́Й,** -ая, -ое **1.** (*о неженатом мужчине*) буйҙаҡ, өйләнмәгән егет; (*о незамужней женщине*) кейәүгә сыҡмаған ҡыҙ **2.** буйҙаҡ(тар) ...ы; **холоста́я компа́ния** буйҙаҡтар төркөмө **3.** буйҙаҡ, яңғыҙаҡ; **холоста́я жизнь** яңғыҙаҡ тормош **4.** *тех.* буш(ҡа), ҡоролай; **холосто́й ход трансформа́тора** трансформаторҙың бушҡа эшләүе **5.** *воен.* йәҙрәһеҙ, пуляһыҙ; **холосты́е патро́ны** пуляһыҙ патрондар **6.** *с.-х.* тыу; **холосто́й ко́лос** тыу башаҡ; **холоста́я кобы́ла** тыу бейә

**ХОЛОСТЯ́К** *м* буйҙаҡ, өйләнмәгән ир-егет; **холостя́чка** *ж*; *прост.* ирһеҙ ҡатын-ҡыҙ; **ста́рый холостя́к** ҡарт буйҙаҡ

**ХОЛОСТЯ́ЦКИЙ,** -ая, -ое *разг.* буйҙаҡ, буйҙаҡ(тар) ...ы, яңғыҙаҡ; **холостя́цкая жизнь** буйҙаҡ тормош

**ХОЛОЩЕ́НИЕ** *с см.* **холости́ть**

**ХОЛОЩЁНЫЙ,** -ая, -ое көйҙөртөлгән, бестерелгән, һылыулатылған

**ХОЛСТ** *м* **1.** (*ткань*) киндер; **небелёный холст** ағартылмаған киндер **2.** *жив.* картина (*киндергә төшөрөлгән рәсем*); **холсты́ Ре́пина** Репин картиналары

**ХОЛСТИ́НА** *ж см.* **холст**; **мешо́к из холсти́ны** киндер тоҡ

**ХОЛУ́Й** *м* и **ХОЛУ́ЙКА** *ж*; *прост.* **1.** *уст.* (*слуга*) хеҙмәтсе, ялсы **2.** *бран., презр.* ҡуштан, ялағай

**ХОЛУ́ЙСТВОВАТЬ** *несов.*; *презр.* ҡуштанланыу, ялағайланыу, ярамһаҡланыу

**ХОЛЩО́ВЫЙ,** -ая, -ое киндер; **холщо́вый мешо́к** киндер тоҡ

**ХОМУ́Т** *м* **1.** ҡамыт; (*для быков*) юрмы; (*для верблюдов*) шүркә; **ко́жаный хому́т** ҡайыш ҡамыт; **наде́ть хому́т** юрмы кейҙереү **2.** *перен., разг.* ҡамыт **3.** *тех.* элмәк, беркетмә, ҡыҫа; **хому́т нажимно́й** ҡыҫыу элмәге ♦ **наде́ть (себе́) хому́т (на ше́ю)** ҡамыт кейеү (*үҙеңә мәшәҡәт өҫтәү*)

**ХОМУТИ́НА** *ж* мөйәт; **лы́ковая хомути́на** йүкә мөйәт

**ХОМЯ́К** *м* алйырҙан, ала ирлән

**ХОМЯ́ЧИЙ,** -ья, -ье алйырҙан ...ы; **хомя́чья нора́** алйырҙан өңө

**ХОР** *м* **1.** хор; **де́тский хор** балалар хоры **2.** *в знач. нареч.* **хо́ром** күмәкләшеп, хор менән, бер тауыштан; **петь хо́ром** күмәкләшеп йырлау; **отвеча́ть хо́ром** бер тауыштан яуап биреү

**ХОРА́Л** *м* хорал (*протестанттарҙа һәм католиктарҙа күп тауышлы йыр, шундай формала музыкаль пьеса*); **хора́лы Ба́ха** Бах хоралдары

**ХОРВА́ТСКИЙ,** -ая, -ое хорват ...ы, Хорватия ...ы; **хорва́тский наро́д** хорват халҡы

**ХОРВА́ТЫ** *мн.* хорваттар, хорват халҡы // *ед.* **хорва́т** *м* хорват ир-аты; **хорва́тка** *ж* хорват ҡатын-ҡыҙы

**ХО́РДА** *ж* **1.** *мат.* хорда (*кәкре һыҙыҡтың ике нөктәһен тоташтырыусы тура һыҙыҡ*); **хо́рда окру́жности** әйләнәнең хордаһы **2.** *зоол.* арҡа һөйәге

**ХО́РДОВЫЙ,** -ая, -ое *зоол.* **1.** арҡа һөйәкле **2.** *в знач. сущ.* **хо́рдовые** *мн.* арҡа һөйәклеләр (*хайуандар тибы*)

**ХОРЕ́Й I** *м*; *лит.* хорей (*шиғыр үлсәме*)

**ХОРЕ́Й II** *м* (*длинный шест*) ҡолға (*санаға егелгән боландарҙы йәки эттәрҙе ҡыуыу өсөн оҙон таяҡ*)

**ХОРЁК** *м* көҙән

**ХОРЕО́ГРАФ** *м* хореограф (*бейеү сәнғәте белгесе*)

**ХОРЕОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое хореография ...ы, хореографик; **хореографи́ческое иску́сство** хореография сәнғәте

**ХОРЕОГРА́ФИЯ** *ж* хореография (*бейеү сәнғәте*)

**ХОРИ́СТ** *м* и **ХОРИ́СТКА** *ж* хорсы (*хорҙа йырлаусы*)

**ХОРМЕ́ЙСТЕР** *м* хормейстер (*хор етәксеһе, хор дирижёры*)

**ХОРОВО́Д** *м* әйлән-бәйлән; **води́ть хорово́ды** әйлән-бәйлән уйнау

**ХОРОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое әйлән-бәйлән ...ы, әйлән-бәйлән уйыны ...ы; **хорово́дные пе́сни** әйлән-бәйлән йырҙары

**ХОРОВО́Й,** -ая, -ое хор ...ы; **хорово́е пе́ние** хор менән йырлау

**ХОРО́МЫ** *только мн.*; *уст.* ҙур өй, һарай

**ХОРОНИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** ерләү, күмеү; **хорони́ть поко́йника** мәйетте ерләү **2.** *что*; *перен.* (*предавать забвению*) онотоу, иҫкергән тип иҫәпләү, иҫтән (хәтерҙән) сығарыу; **хорони́ть ста́рые обы́чаи** иҫке йолаларҙы онотоу

**ХОРОНИ́ТЬСЯ I** *несов. страд. от* **хорони́ть**

**ХОРОНИ́ТЬСЯ II** *несов.*; *прост.* (*прятаться*) йәшеренеү, йәшенеү, ҡасыу

**ХОРОХО́РИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* әтәсләнеү, ҡуҡырайыу

**ХОРО́ШЕНЬКИЙ,** -ая, -ое **1.** күркәм, мөләйем, яғымлы; **хоро́шенькая де́вочка** яғымлы ҡыҙ **2.** *разг., ирон.* (*скверный*) насар, шәп (шәптән) түгел; **хоро́шенькое де́ло** эштәр шәптән түгел ♦ **хоро́шенького понемно́жку** *ирон.* яҡшы (тәмле) нәмә күп булмай

**ХОРОШЕ́НЬКО** *нареч.*; *разг.* яҡшылап, ипләп, һәйбәтләп; **хороше́нько прове́рить** яҡшылап тикшереү

**ХОРОШЕ́ТЬ** *несов.* матурланыу, күркәмләнеү; (*о ком-л.*) һылыуланыу; (*о чём-л.*) һәйбәтләнеү, төҙөкләнеү, яҡшыра барыу; **село́ хороше́ет** ауыл матурлана

**ХОРО́ШИЙ,** -ая, -ее **1.** яҡшы, һәйбәт; **хоро́шая кни́га** һәйбәт китап; **хоро́ший челове́к** яҡшы кеше; **(уж) о́чень хоро́ший** уғата яҡшы **2.** (*близкий*) яҡын, яҡшы; **хоро́ший знако́мый** яҡшы таныш **3.** *разг.* (*достаточно большой*) ҙур ғына, күп кенә, елле; **хоро́шие де́ньги** күп кенә аҡса **4.** (*красивый*) гүзәл, һоҡландырғыс, матур; **как хороши́ э́ти цветы́!** был сәскәләр ниндәй гүзәл! **5.** *разг.* (*милый, любимый*) һөйөклө, ҡәҙерле; **мой хоро́ший** һөйөклөм **6.** *обычно в кратк. ф.*; *разг., ирон.* яҡшы (инде), шәп (инде); **хоро́ш, не́чего сказа́ть** яҡшы, әйтеп тораһы ла юҡ **7.** *в знач. сущ.* **хоро́шее** *с* яҡшылыҡ, яҡшы (нәмә); **жела́ю вам всего́ хоро́шего** һеҙгә яҡшылыҡ теләйем ♦ **хоро́шее де́ло**: 1) шәп эш (*хуплау һүҙе*); 2) шәп, имеш (*мыҫҡыллау һүҙе*)

**ХОРОШО́ 1.** *нареч.* яҡшы, һәйбәт, матур, шәп; **хорошо́ рабо́тать** яҡшы эшләү; **петь хорошо́** матур йырлау; **хорошо́ принима́ть** һәйбәт ҡабул итеү **2.** *кому в знач. сказ., безл.* яҡшы, рәхәт, йайлы; **мне здесь хорошо́** миңә бында яҡшы **3.** *в знач. сказ., безл.* (*с союзами "что", "если", "когда"*) ярай, яҡшы; **хорошо́, е́сли она́ придёт** ул килһә, яҡшы булыр ине **4.** *в знач. сказ., безл.* хуп, яҡшы; **о́чень хорошо́!** бик яҡшы! **5.** *в знач. утверд. частицы* ярар, ярай; **хорошо́, я ско́ро приду́** ярай, мин тиҙҙән килермен **6.** *в знач. вводн. сл.*; *разг.* (*допустим*) яҡшы, ярар, шулай; **хорошо́, пусть бу́дет по-тво́ему** ярар, һинеңсә булһын әйҙә **7.** *в знач. частицы.*; *разг.* (*при угрозе*) ярар, ҡара уны; **хорошо́! Я э́то запо́мню!** ярар! Мин быны онотмам! **8.** *в знач. сущ.* **хорошо́** *с нескл.* яҡшы; **учи́ться на хорошо́** яҡшы уҡыу

**ХОРУ́ГВЬ** *ж* **1.** *уст.* хәрби (ғәскәри) байраҡ **2.** хоругвь (*христиандарҙа изгеләр рәсеме төшөрөлгән тыу*)

**ХОРУ́НЖИЙ** *м*; *ист.* хорунжий (**1.** *байраҡ йөрөтөүсе* **2.** *революцияға тиклем Рәсәйҙә казачий ғәскәрҙә подпоручикка тиң офицер чины, шул чиндағы кеше*)

**ХО́РЫ** *только мн.*; *архит.* хоры (*асыҡ галерея*)

**ХОРЬ** *м см.* **хорёк**

**ХОРЬКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** көҙән ...ы; **хорько́вый мех** көҙән тиреһе **2.** көҙән; **хорько́вая ша́пка** көҙән бүрек

**ХОТЕ́НИЕ** *с*; *разг. см.* **жела́ние** 1

**ХОТЕ́ТЬ** *несов. чего, с союзом "чтобы" и с неопр.* (*иметь желание, намерение*) -ғы/-ге (-ын/-ен) теләү (килеү, ниәтләнеү, ниәт итеү); **хоте́ть пить** эске килеү; **хоте́ть мя́са** ит ашағы килеү; **хочу́, что́бы всё бы́ло хорошо́** бөтәһе лә һәйбәт булыуын теләйем; **что вы э́тим хоти́те сказа́ть?** быны менән нимә әйтергә теләйһегеҙ?; **е́сли хоти́те** теләһәгеҙ ♦ **е́сли хоти́те (хо́чешь)** *см.* **е́сли**; **как хоти́те**: 1) теләһәң нишлә; 2) нимә генә тиһәң дә; **хо́чешь не хо́чешь** теләһәң-теләмәһәң дә

**ХОТЕ́ТЬСЯ** *несов. чего безл. см.* **хоте́ть**; **хо́чется спать** йоҡлағы килә; **ей не хо́чется разгова́ривать** уның һөйләшкеһе килмәй

**ХОТЬ** *союз* и *частица* **1.** *союз уступ.* (*несмотря на то, что*) -һа ла/-һә лә, булһа ла, ҡарамаҫтан; **конь хоть и стар, но силён** ҡарт ат булһа ла көсө бар **2.** *союз уступ.* (*можно, впору*) -һаң да/-һәң дә; **хоть убе́й, не ска́жет** үлтерһәң дә әйтмәҫ **3.** *союз уступ.* булһа ла, ... булһа ла; йәки ..., йәки; -мы/-ме ..., -мы/-ме; **приди́ хоть сейча́с, хоть за́втра** хәҙер булһа ла, иртәгә булһа ла кил **4.** *частица усил.* (*по крайней мере*) исмаһам, һис булмаһа; **скажи́те хоть одно́ сло́во** исмаһам бер генә һүҙ әйтегеҙ **5.** *частица выделительная* (*например*) мәҫәлән; **взять хоть э́тот слу́чай** мәҫәлән ошо ваҡиғаны алайыҡ **6.** *частица усил.* теләһә, булһа ла; **хоть како́й** теләһә ниндәй; **хоть как** теләһә нисек; **хоть что** ни булһа ла **7.** *частица усил.* (*даже*) хатта, булһа ла, нисек тә; **будь он хоть семи́ пя́дей во лбу** ул хатта бик аҡыллы булһа ла ♦ **хоть бы хны** *см.* **хны**; **хоть куда́** *см.* **куда́**; **хоть бы что** *см.* **что** I;

**хоть во́лком вой** *см.* **волк**; **хоть глаз вы́коли** *см.* **коло́ть** I; **хоть голово́й об сте́ну бе́йся** башыңды ташҡа бәрһәң дә; **хоть завали́сь** *см.* **завали́ться**; **хоть кол на голове́ теши́** *см.* **кол**; **хоть отбавля́й** быуа быуырлыҡ; **хоть топо́р ве́шай** *прост.* тын алғыһыҙ ҡара төтөн; **хоть тре́сни (ло́пни)** *прост.* шартлаһаң да; **хоть умри́** ятып үлһәң дә; **хоть шаро́м покати́** буп-буш; **хоть плачь** ултырып илаһаң да; **хоть режь** тураҡлап ташлаһаң да; **хоть стой, хоть па́дай** ер тишегенә ин дә кит (*уңайһыҙланыу*)

**ХОТЯ́** *союз* и *частица* **1.** *союз уступ. см.* **хоть** 1; **он хотя́ и согласи́лся, но оста́лся недово́лен** ризалашыуын ризалашһа ла, ҡәнәғәт ҡалманы **2.** *союз противит.* (*однако, но*) -һа ла/-һә лә; **она́ учи́лась хорошо́, хотя́ и ча́сто боле́ла** ул йыш ауырыһа ла, яҡшы уҡый ине

**ХОХЛА́ТКА** *ж* **1.** *разг. зоол.* өлтөклө (бүрекле) ҡош **2.** *зоол.* бүрекле күбәләк, суҡлы баш күбәләк (*төнгө күбәләк төрө*) **3.** *бот.* яҙ йондоҙо (*үҫемлек*)

**ХОХЛА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** өлтөклө, бүрекле, супай; **хохла́тая ку́рица** супайлы тауыҡ; **хохла́тый го́лубь** бүрекле күгәрсен **2.** *разг.* (*лохматый*) йөнтәҫ, ялбыр

**ХО́ХЛИТЬ** *несов. что* ҡабартыу, тырпайтыу (*йөн-ҡауырһынды*)

**ХО́ХЛИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*о птицах*) (йөнөн) ҡабартыу (тырпайтыу, өлтәйтеү), ҡабарыныу **2.** *перен., разг.* (*становиться мрачным — о человеке*) сырай һытыу (боҙоу)

**ХОХЛУ́ШКА I** *ж см.* **хохла́тка** 1

**ХОХЛУ́ШКА II** *ж см.* **хохо́л** II

**ХО́ХМА** *м*; *прост.* (*весёлая шутка*) шаянлыҡ, көлкө

**ХОХО́Л I** *м* өлпө, өлтөк, бүрек, кикел, супай; **ку́рица с хохло́м** бүрекле тауыҡ; **зачеса́ть во́лосы хохло́м** сәсте өлтөк итеп тарау

**ХОХО́Л II** *м* и **ХОХЛУ́ШКА II** *ж*; *прост.* (*украинец и украинка*) хохол

**ХОХОЛО́К** *м*; *разг., уменьш. от* **хохо́л** I; **пти́ца с хохолко́м** өлпөлө ҡош

**ХО́ХОТ** *м* шарҡылдап (ҡысҡырып) көлөү (көлгән тауыш); **слы́шен хо́хот** шарҡылдап көлгән тауыш ишетелә; **взрыв хо́хота** шарҡылдап көлөп ебәреү

**ХОХОТА́НИЕ** *с см.* **хохота́ть**

**ХОХОТА́ТЬ** *несов.* (*громко смеяться*) көлөү, иһаһайлау, шарҡылдап (иһаһайлап) көлөү; **хохота́ть до упа́ду** хәл бөткәнсе көлөү

**ХОХОТУ́Н** *м* и **ХОХОТУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* көләкәс, шарҡылдаҡ, йырыҡ ауыҙ

**ХРАБРЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* ҡыйыуланыу, батырланыу, батырайыу

**ХРАБРЕ́Ц** *м* батыр, ҡыйыу (*кеше*)

**ХРАБРИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* батырайыу, ҡыйыуланыу

**ХРА́БРОСТЬ** *ж* батырлыҡ, ҡыйыулыҡ; **прояви́ть хра́брость** батырлыҡ күрһәтеү; **отлича́ться хра́бростью** батырлыҡ менән танылыу

**ХРА́БРЫЙ,** -ая, -ое батыр, ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ; **стать хра́брым** ҡыйыуланыу; **хра́брый во́ин** батыр яугир ♦ **не из хра́брого деся́тка** батырҙарҙан түгел

**ХРАМ** *м* **1.** ғибәҙәтхана, сиркәү **2.** *кого-чего*; *перен., высок.* храм, һарай, йорт; **храм нау́ки** фән һарайы; **храм иску́сства** сәнғәт һарайы

**ХРАНЕ́НИЕ** *с см.* **храни́ть** 1; **сдать на хране́ние** һаҡлауға биреү; **ка́мера хране́ния** (багаж) һаҡлау камераһы

**ХРАНИ́ЛИЩЕ** *с* һаҡлағыс, һаҡлау урыны

**ХРАНИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** һаҡлаусы; **храни́тель ру́кописей** ҡулъяҙмалар һаҡлаусы **2.** һаҡлаусы, һаҡлап йөрөүсе (тороусы); **храни́тель тради́ций** ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлаусы **3.** (*должность*) һаҡлаусы (хеҙмәткәр); **храни́тель музе́я** музей һаҡлаусы хеҙмәткәр

**ХРАНИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж см.* **храни́тель** 1, 2

**ХРАНИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** һаҡлау, (йыйып) тотоу; **храни́ть та́йну** сер һаҡлау; **храни́ть в па́мяти** хәтерҙә һаҡлау; **храни́ть как свято́е завеща́ние** изге аманат итеп һаҡлау **2.** (*оберегать*) һаҡлау, ҡурсалау, ҡарап тороу; **судьба́ меня́ храни́т** яҙмыш мине ҡурсалай **3.** (*строго соблюдать*) һаҡлау, тотоу; **храни́ть обы́чаи** ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тотоу ♦ **храни́ть молча́ние** өндәшмәү, шым булыу, шымыу; **храни́ть го́рдый вид** ғорур ҡиәфәттә ҡалыу

**ХРАНИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һаҡланыу, һаҡланып (йыйылып) тороу, тотолоу; **докуме́нты храня́тся в архи́ве** документтар архивта һаҡлана **2.** *страд. от* **храни́ть**

**ХРАП** *м* **1.** (*звуки, издаваемые спящим*) ғырылдау, хырылдау; (*о лошадях*) бышҡырыу **2.** (*нижняя и средняя часть переносья у животных*) морон сиге

**ХРАПЕ́ТЬ** *несов.* **1.** ғырылдау, ғырлау; (*о лошадях*) бышҡырыныу **2.** *разг.* (*крепко спать*) ғырылдап (хырылдап) йоҡлау

**ХРАПОВИ́К** *м* храповик (*валдың бер яҡҡа ғына әйләнеүен тәьмин итә торған йайланма*)

**ХРАПОВО́Й: храпово́й механи́зм** *см.* **храпови́к**

**ХРЕБЕ́Т** *м* **1.** (*позвоночник человека*) умыртҡалыҡ; (*позвоночник животного*) һырт; **хребе́т коня́** ат һырты **2.** *прост.* (*спина*) арҡа, һырт, елкә; **таска́ть на хребте́** арҡаға аҫып йөрөтөү **3.** (*горная цепь*) арҡа, һырт, тау һырты; **Ура́льский хребе́т** Урал һырты; **поднима́ться на хребе́т** арҡаға менеү ♦ **гнуть хребе́т** *см.* **гнуть**

**ХРЕБТО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** умыртҡалыҡ ...ы, арҡа ...ы; **хребто́вые позвонки́** умыртҡалыҡ һөйәктәре **2.** һырт ...ы; **хребто́вая шерсть ко́шки** бесәйҙең һырт йөнө **3.** (*горный*) тау һырты ...ы; **хребто́вые перева́лы** тау һырты артылыштары

**ХРЕН** *м* **1.** (*растение*) керән **2.** (*корень этого растения*) керән тамыры

**ХРЕНО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** керән ...ы; **хрено́вые ли́стья** керән япраҡтары **2.** *груб.-прост.* алама, насар

**ХРЕСТОМА́ТИЯ** *ж* хрестоматия (*әҫәрҙәр йыйынтығы*); **хрестома́тия для шко́льников** уҡыусылар өсөн хрестоматия

**ХРИЗАНТЕ́МА** *ж* хризантема, әрем гөлө, алтын сәскә

**ХРИЗОЛИ́Т** *м* хризолит (*аҫыл таш*)

**ХРИП** *м* ғыжылдау, хырылдау; **хри́пы в лёгких** үпкәләге ғыжылдау

**ХРИПЕ́НИЕ** *с см.* **хрипе́ть**

**ХРИПЕ́ТЬ** *несов.* **1.** ғыжылдау, хырылдау **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*хрипло говорить, петь*) ҡарлыҡҡан тауыш менән һөйләшеү (йырлау)

**ХРИ́ПЛЫЙ,** -ая, -ое (*сиплый, сопровождаемый шумами*) ғыжылдаҡ, хырылдаҡ, ҡарлыҡҡан; **хри́плый го́лос** ҡарлыҡҡан тауыш

**ХРИ́ПНУТЬ** *несов.* (*становиться хриплым*) ҡарлығыу

**ХРИПОТА́** *ж* ҡарлығыу, ғыжылдау; **крича́ть до хрипоты́** тамаҡ ҡарлыҡҡансы ҡысҡырыу

**ХРИПУ́Н** *м* и **ХРИПУ́НЬЯ** ж; *разг.* ғыжылдаҡ (ҡарлыҡҡан тауышлы) кеше

**ХРИСТИАНИЗА́ЦИЯ** *ж* христианлаштырыу, христианлыҡты таратыу; **христианиза́ция наро́дов Пово́лжья** Волга буйы халыҡтарын христианлаштырыу

**ХРИСТИАНИ́Н** *м* и **ХРИСТИА́НКА** *ж* христиан (*христиан динендәге кеше*)

**ХРИСТИА́НСКИЙ,** -ая, -ое христианлыҡ ...ы, христиан(дар) ...ы; **христиа́нская рели́гия** христиан дине

**ХРИСТИА́НСТВО** *с* **1.** христианлыҡ, христиан дине; **принима́ть христиа́нство** христиан динен ҡабул итеү **2.** *собир.* христиандар

**ХРОМ** *м* хром (**1.** *химик элемент, аҡһыл һары ҡаты металл* **2.** *һары буяуҙың бер төрө* **3.** *йомшаҡ йоҡа күн*)

**ХРОМАТИ́ЗМ** *м* хроматизм (**1.** *физ. аҡ нурҙың төрлө төҫтәрҙәге нурҙарға тарҡалыу һәләте* **2.** *муз. тауыштың ярымтондарға бүленеп күтәрелә йәки төшә барыуы*)

**ХРОМАТИ́Н** *м*; *спец.* хроматин (*күҙәнәк йәҙрәһенең буялыусы матдәһе*)

**ХРОМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *физ., муз.* хроматик, хроматизмға нигеҙләнгән; **хромати́ческое разложе́ние луче́й** нурҙарҙың хроматизмға нигеҙләнгән тарҡалыуы; **хромати́ческая га́мма** хроматик гамма

**ХРОМА́ТЬ** *несов.* **1.** аҡһау, аҡһаҡлау, сатанлау; **ло́шадь хрома́ет** ат аҡһай; **он си́льно хрома́ет** ул ныҡ сатанлай **2.** *перен., разг.* аҡһау; **дисципли́на хрома́ет** тәртип аҡһай; **хрома́ть по фи́зике** физиканан аҡһау ♦ **хрома́ть на о́бе ноги́** ике аяҡҡа ла аҡһау

**ХРОМИ́РОВАНИЕ** *с*; *спец. см.* **хроми́ровать**

**ХРОМИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *спец.* хромлау, хром (менән) ҡаплау; **хроми́ровать ко́жу** күнде хромлау

**ХРО́МИСТЫЙ,** -ая, -ое *хим.* хромлы, хром ҡатыш; **хро́мистая сталь** хромлы ҡорос

**ХРО́МКА** *ж* хромка (*хроматик гармундың бер төрө*)

**ХРО́МОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*содержащий хром*) хромлы, хром ҡатыш; **хро́мовая руда́** хромлы мәғдән **2.** (*производимый при помощи хрома*) хром ярҙамында (менән) эшләнгән, хромлап; **хро́мовое дубле́ние ко́жи** тирене хромлап дуплау **3.** хром, хромдан тегелгән; **хро́мовые сапоги́** хром итек

**ХРОМО́Й,** -ая, -ое **1.** аҡһаҡ, сатан; **хромо́й челове́к** сатан кеше; **оста́ться хромы́м** аҡһаҡ булып ҡалыу **2.** *разг.* (*о мебели*) аяғы һынған, бер аяғы ҡыҫҡа

**ХРОМОЛИТОГРА́ФИЯ** *ж*; *полигр.* хромолитография (**1.** *литография ысулы менән төрлө буяуҙа баҫыу* **2.** *ошо юл менән яһалған һүрәт*)

**ХРОМОНО́ГИЙ,** -ая, -ое *разг.* аҡһаҡ (сатан) аяҡлы

**ХРОМОНО́ЖКА** *м* и *ж*; *разг.* аҡһаҡ, сатан (*гәҙәттә ҡатын-ҡыҙ, бала*)

**ХРОМОСО́МЫ** *мн.* (*ед.* **хромосо́ма** *ж*); *биол.* хромосомалар (*күҙәнәктә организмдың нәҫел сифаттарын йөрөткән матдә*)

**ХРОМОСФЕ́РА** *ж*; *астр.* хромосфера (*Ҡояш атмосфераһының ҡояш тотолғанда күренә торған ҡыҙыл алҡа һымаҡ тышҡы ҡатлауы*)

**ХРОМОТА́** *ж* аҡһаҡлыҡ, сатанлыҡ

**ХРОМОТИ́ПИЯ** *ж*; *полигр.* хромотипия (*төрлө төҫтә баҫып сығарыу һәм шундай ысул менән типографияла баҫылған баҫма*)

**ХРО́НИК** *м*; *разг.* хроник (*туҡтауһыҙ ауырыған кеше*)

**ХРО́НИКА** *ж* хроника (**1.** *йылъяҙма* **2.** *гәзиттә көндәлек ваҡиғалар бүлеге* **3.** *ағымдағы тормош күренештәрен күрһәтә торған документаль фильм* **4.** *әҙ. тарихи, сәйәси, ижтимағи һ.б. ваҡиғаларҙың тарихын үҙ эсенә алған әҙәби әҫәр*)

**ХРОНИКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое хроникаль, хроника ...ы; **хроника́льный фильм** хроникаль фильм

**ХРОНИКЁР** *м* хроникасы (*гәзиттең хроника бүлегенә хәбәрҙәр биреп тороусы хеҙмәткәр*)

**ХРОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*о болезни*) хроник, оҙаҡҡа һуҙылған, оҙайлы, ҡайтмалы; **хрони́ческая боле́знь** ҡайтмалы ауырыу **2.** (*страдающий такой болезнью*) оҙаҡ ауырыусы; **хрони́ческий больно́й** оҙаҡ ауырыусы кеше **3.** *перен.* оҙаҡ, дауамлы, оҙаҡҡа һуҙылған; **хрони́ческая безде́ятельность** оҙаҡҡа һуҙылған эшһеҙлек

**ХРОНО́ГРАФ I** *м* (*памятник древней письменности*) хронограф

**ХРОНО́ГРАФ II** *м* хронограф (*ҡыҫҡа ваҡыт араһын йәки төрлө ваҡиға, күренештәрҙе бик дөрөҫ итеп регистрациялай торған прибор*)

**ХРОНОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое хронологик, хронология ...ы; **хронологи́ческий поря́док** хронологик тәртип



20 зак. 2.0007.06

**ХРОНОЛО́ГИЯ** *ж* хронология (**1.** *бер-бер артлы теҙелеп яҙылған ваҡиғалар исемлеге* **2.** *ваҡиғаларҙың, күренештәрҙең ваҡыт яғынан эҙмә-эҙлелеге* **3.** *йыл иҫәбе тарихын өйрәнә торған фән, йылдар тарихы фәненең тармағы*)

**ХРОНО́МЕТР** *м* хронометр (*ваҡытты дөрөҫ күрһәтә торған астрономик сәғәт*)

**ХРОНОМЕТРА́Ж** *м* хронометраж (*эш ваҡытын файҙаланыуҙы дөрөҫ билдәләү ысулы*)

**ХРОНОМЕТРАЖИ́СТ** *м* хронометражсы

**ХРОНОМЕТРИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* хронометражлау, хронометраж яһау

**ХРОНОМЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое хронометрик, хронометр ярҙамында; **хронометри́ческое определе́ние вре́мени** ваҡытты хронометр ярҙамында билдәләү

**ХРОНОСКО́П** *м* хроноскоп (*бик ҡыҫҡа ваҡыт араһын үлсәй торған электр сәғәте*)

**ХРУ́ПАТЬ** *несов. что*; *разг.* **1.** (*издавать хруп*) шатырлатыу **2.** шытырлатып ашау; **хру́пать морко́вку** кишерҙе шытырлатып ашау

**ХРУ́ПКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*ломкий*) ыуалыусан, ватылыусан, мурт; **хру́пкий мета́лл** мурт металл **2.** (*слабый, болезненный*) сибек, сирләшкә, хәлһеҙ **3.** (*нежный, тонкий*) нәфис, нескә; **хру́пкая де́вушка** нәфис ҡыҙ

**ХРУ́ПКОСТЬ** *ж* **1.** (*ломкость*) һыныусанлыҡ, муртлыҡ, ыуалыусанлыҡ **2.** (*слабость, болезненность*) сибеклек, сирләшкә булыу, хәлһеҙлек **3.** *перен.* (*нежность, тонкость*) нәфислек

**ХРУСТ** *м* шытырлау; (*при еде*) кетерләү; (*снега под ногами*) шығырлау; (*льда под ногами*) сытырлау; **есть сухари́ с хру́стом** кетерләтеп сохарый ашау

**ХРУСТА́ЛИК** *м*; *анат.* күҙ яҫмығы

**ХРУСТА́ЛЬ** *м* **1.** *минер.* гәлсәр **2.** бәлләүер, гәлсәр (*бик яҡшы сифатлы саф быяла*) **3.** *собир.* гәлсәр (*шундай быяланан яһалған һауыт-һаба*) ♦ **го́рный хруста́ль** *см.* **го́рный**

**ХРУСТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** гәлсәр ...ы **2.** (*сделанный из хрусталя*) гәлсәр; **хруста́льная посу́да** гәлсәр һауыт-һаба **3.** *перен.* саф, бик таҙа, үтә күренеп торған; **хруста́льная вода́** бик таҙа һыу

**ХРУСТА́Н** *м* ала сәпсәү (*кош*)

**ХРУСТЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*при еде*) кетерләү, кертләү, кертелдәү, ҡытырлау; (*о пальцах*) шыртылдау, шытырлау; (*о ветке и т.п.*) шартылдау, шартлау; (*о снеге*) шығырлау; (*о льде*) сытырлау; (*о бумаге*) ҡыштырлау; **снег хрусти́т под нога́ми** аяҡ аҫтында ҡар шығырлай; **хлеб хрусти́т** икмәк кетерләй **2.** *чем* (*при еде*) кетерләтеү, кертләтеү, кертелдәтеү, ҡытырлатыу; (*бумагой*) ҡыштырлатыу; (*пальцами*) шыртылдатыу, шатырлатыу; (*снегом*) шығырлатыу; (*ветками и т.п.*) шартылдатыу, шартлатыу; **хрусте́ть огурцо́м** ҡыярҙы кертләтеү

**ХРУ́СТНУТЬ** *сов. см.* **хрусте́ть**

**ХРУЩ** *м* май ҡуңғыҙы

**ХРЫЧ** *м*; *прост., бран.* ҡартлас, ҡарт ишәк; **хрычо́вка** *ж*; *прост., бран.* ҡарт убыр

**ХРЮ́КАНЬЕ** *с* (*крик свиньи*) мырҡылдау, хорҡолдау; **слы́шно хрю́канье** хорҡолдау ишетелә

**ХРЮ́КАТЬ** *несов.* мырҡылдау, хорҡолдау, мырҡылдап ҡуйыу, мырҡ итеү; **поросёнок хрю́кает** сусҡа балаһы мырҡылдай

**ХРЮ́КНУТЬ** *сов. см.* **хрю́кать**

**ХРЮ́ШКА** *ж*; *разг.* инә сусҡа (дуңғыҙ)

**ХРЯК** *м*; *с.-х., обл.* ата сусҡа (дуңғыҙ)

**ХРЯЩ I** *м*; *анат.* кимерсәк; **хрящ горта́ни** боғаҙ кимерсәге

**ХРЯЩ II** *м*; *уст., геол.* эре ҡом (*ҡаты тау тоҡомдарынан барлыҡҡа килгән*)

**ХРЯЩЕВА́ТЫЙ I,** -ая, -ое кимерсәкле; **хрящева́тое мя́со** кимерсәкле ит

**ХРЯЩЕВА́ТЫЙ II,** -ая, -ое *уст., геол.* эре ҡомло, эре ҡомдан торған; **хрящева́тая по́чва** эре ҡомло тупраҡ

**ХРЯЩЕВО́Й I,** -ая, -ое **1.** *анат.* кимерсәк; **хрящева́я ткань** кимерсәк туҡыма **2.** кимерсәк һөлдәле; **хрящевы́е ры́бы** кимерсәк һөлдәле балыҡтар

**ХРЯЩЕВО́Й II,** -ая, -ое *уст., геол.* эре ҡомо булған

**ХУДЕ́ТЬ** *несов.* ябығыу, ябығып китеү, һурығыу, арыҡланыу, элмәйеү; (*о животных*) яшыҡланыу, арыҡланыу; **ребёнок похуде́л** бала ябыҡҡан

**ХУ́ДО I** *с*; *разг.* яманлыҡ, насарлыҡ, яман; **не де́лать ху́да** насарлыҡ эшләмәү ♦ **нет ху́да без добра́** *см.* **добро́** I

**ХУ́ДО II 1.** *нареч.* насар, яман, әшәке; **э́то мо́жет ко́нчиться ху́до** бының насар бөтөүе ихтимал **2.** *кому в знач. сказ., безл.* ауыр, насар; **больно́му ху́до** ауырыуҙың хәле насар; **им пришло́сь ху́до** уларға бик ауырға тура килде

**ХУДОБА́** *ж* ябыҡлыҡ, арыҡлыҡ

**ХУДО́ЖЕСТВЕННОСТЬ** *ж* нәфислек, художестволылыҡ

**ХУДО́ЖЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** нәфис; **худо́жественный фильм** нәфис фильм **2.** сәнғәт ...ы, художество ...ы; **худо́жественная шко́ла** сәнғәт мәктәбе; **худо́жественный руководи́тель теа́тра** театрҙың художество етәксеһе **3.** сәнғәт ...ы, художество(лы); **худо́жественная вы́ставка** сәнғәт күргәҙмәһе; **худо́жественный музе́й** сәнғәт музейы **4.** нәфис, тасуири; **худо́жественная вы́шивка** нәфис сигеү; **худо́жественное чте́ние** тасуири уҡыу **5.** нәфис, художестволы, сәнғәт ...ы; **худо́жественные досто́инства рома́на** романдың сәнғәт әҫәре буларак яҡшы яҡтары **6.** художестволы оҫталыҡ (маһирлыҡ, таһыллыҡ) ...ы; **худо́жественное дарова́ние** художестволы оҫталыҡ һәләте ♦ **худо́жественная самоде́ятельность** үҙешмәкәр сәнғәт; **худо́жественная литерату́ра** матур әҙәбиәт

**ХУДО́ЖЕСТВО** *с* **1.** *уст.* (*искусство*) һынлы сәнғәт, художество; **Российская акаде́мия худо́жеств** Рәсәй художество академияһы **2.** *разг.* (*проделка*) йәмһеҙ ҡыланыш, мутлыҡ, этлек; **э́то всё их худо́жества** былар бөтәһе уларҙың мутлығы

**ХУДО́ЖНИК** *м* **1.** (*живописец*) рәссам; **изве́стный худо́жник** билдәле рәссам **2.** сәнғәт әһеле (эшмәкәре), ижадсы **3.** (*мастер*) оҫта; **худо́жник по де́реву** ағас оҫтаһы

**ХУДО́ЖНИЦА** *ж см.* **худо́жник** 1, 2

**ХУДО́Й I,** -ая, -ое (*о человеке*) ябыҡ, арыҡ, тарамыш; (*о животных*) арыҡ, яшыҡ; **худо́й челове́к** тарамыш кеше; **худа́я ло́шадь** арыҡ ат

**ХУДО́Й II,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*плохой*) яман, насар, боҙоҡ; **худа́я сла́ва** насар дан, яманат **2.** *разг.* (*дырявый, ветхий*) алама, йыртыҡ, туҙған, тишек; **худо́й карма́н** тишек кеҫә ♦ **на худо́й коне́ц** *см.* **коне́ц**; **не говоря́ худо́го сло́ва** өндәшмәй-нитмәй

**ХУДОСО́ЧИЕ** *с* ябыҡлыҡ, хәлһеҙлек, ябығып ауырыу

**ХУДОСО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ябыҡ, хәлһеҙ, сирләшкә

**ХУДОЩА́ВОСТЬ** *ж* (*о человеке*) ябыҡлыҡ, ҡаҡсалыҡ, арыҡлыҡ

**ХУДОЩА́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡаҡса, сандыр, асҡаҡ, арыҡ; **худоща́вое лицо́** ҡаҡса йөҙ; **худоща́вая фигу́ра** ҡаҡса һын

**ХУ́ДШИЙ,** -ая, -ее **1.** *превосх. ст. от* **худо́й** II 1 и **плохо́й** 1—3 иң насар (боҙоҡ, яман); **ху́дшие показа́тели** иң насар күрһәткестәр **2.** *в знач. сущ.* **ху́дшее** *с* иң яманы, иң насары; **случи́лось ху́дшее** иң насары булды

**ХУДЫ́ШКА** *м* и *ж*; *прост.* (*обычно о девочке*) ныҡ ябыҡ (ҡыҙ)

**ХУ́ЖЕ** *сравн. ст. от* **худо́й** II 1 и **ху́до** II насыраҡ, яманыраҡ, боҙоғораҡ; **быть ху́же** насыраҡ булыу; **ху́же не́куда** бынан да яманыраҡ булыуы мөмкин түгел ♦ **ху́же го́рькой ре́дьки** *см.* **ре́дька**

**ХУЛА́** *ж* хурлау, яманлау

**ХУЛИГА́Н** *м* и **ХУЛИГА́НКА** *ж* хулиган

**ХУЛИГА́НИТЬ** *несов.* хулиганлыҡ ҡылыу

**ХУЛИГА́НСКИЙ,** -ая, -ое хулиганлыҡ ...ы, хулигандарса; **хулига́нский посту́пок** хулигандарса ҡыланыш; **хулига́нское побужде́ние** хулиганлыҡ уйы (ниәте)

**ХУЛИГА́НСТВО** *с* хулиганлыҡ

**ХУЛИГАНЬЁ** *с собир.*; *разг.* хулигандар

**ХУЛИ́ТЬ** *несов. кого-что* яманлау, хурлау, кәмһетеү

**ХУ́НТА** *ж* хунта (**1.** *испан телле илдәрҙә ижтимағи-сәйәси ойошмалар, берекмәләр, йыйылыштар һ.б. исеме* **2.** *дәүләт түңкәрелеше яһап хакимиәткә килгән хәрби хөкүмәт*)

**ХУРА́Л** *м* хурал (*Монголияла дәүләт хакимиәте органдары исеме*)

**ХУРМА́** *ж* хөрмә (*ағасы һәм емеше*); **есть хурму́** хөрмә ашау; **хурма́ япо́нская** япон хөрмәһе

**ХУ́ТОР** *м* хутор, утар

**ХУТОРСКО́Й,** -ая, -ое утар ...ы, хутор ...ы; **хуторско́е хозя́йство** утар хужалығы

**ХУТОРЯ́НИН** *м* и **ХУТОРЯ́НКА** *ж* **1.** утарҙа йәшәүсе **2.** (*владелец хутора*) утар биләүсе

# Ц

**ЦА́НГА** *ж*; *тех.* цанга (*пружиналы ҡыҫтырғыс*)

**ЦАП** *межд. в знач сказ.*; *прост.* һоп; **цап за́ ногу** аяғынан һоп

**ЦА́ПАТЬ** *несов. кого-что*; *прост.* **1.** (*хватать когтями, зубами*) эләктереп (тотоп, тешләп, тырнап) алыу **2.** (*хватать рукой*) эләктереп (тотоп) алыу

**ЦА́ПАТЬСЯ** *несов.*; *прост.* **1.** *см.* **ца́пать** 1; **2.** *перен.* (*ссориться*) әрләшеү, эләгешеү, әйтешеү, тиргәшеү

**ЦА́ПКА** *ж*; *разг.* кәтмән, тәпке

**ЦА́ПЛЯ** *ж* селән

**ЦА́ПНУТЬ** *сов. см.* **ца́пать**

**ЦА́ПФА** *ж*; *тех.* цапфа (*валдың йәки күсәрҙең подшипникка терәлеп әйләнә торған өлөшө*)

**ЦАП-ЦАРА́П** *межд. в знач. сказ.*; *разг.* һап, һоп; **ко́шка мы́шку цап-цара́п** бесәй сысҡанды һоп

**ЦАРА́ПАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* тырнау, тырнап яралау; **цара́пать ру́ку** ҡулды тырнау **2.** *разг.* (*чертить, писать*) һыҙғылау, сыймаҡлау; **цара́пать письмо́** хат сыймаҡлау

**ЦАРА́ПАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **цара́пать** 1; **2.** тырнашыу; **ко́шка цара́пается** бесәй тырнаша

**ЦАРА́ПИНА** *ж* тырнаҡ эҙе, тырналған урын, сыйылған (тырналған) эҙ; **цара́пина на полу́** иҙәндәге сыйылған эҙ

**ЦАРЕ́ВИЧ** *м* батша улы; **царе́вна** *ж* батша ҡыҙы

**ЦАРЕУБИ́ЙЦА** *м* и *ж* батша(ны) үлтереүсе

**ЦАРИ́ЗМ** *м* батшалыҡ; **сверже́ние цари́зма** батшалыҡты ҡолатыу

**ЦАРИ́ТЬ** *несов.* **1.** *уст. см.* **ца́рствовать** 1; **2.** (*охватывать — о покое, тишине и т.д.*) хөкөм һөрөү; **в лесу́ цари́т тишина́** урманда тынлыҡ хөкөм һөрә

**ЦАРИ́ЦА** *ж* **1.** ҡатын батша, әбей батша **2.** (*жена царя*) батша ҡатыны **3.** *чего*; *перен.* күрк, батша; **цари́ца ба́ла** балдың күрке; **цари́ца мо́ды** мода батшаһы

**ЦА́РСКИЙ,** -ая, -ое батша ...ы; **ца́рский двор** батша һарайы; **ца́рское прави́тельство** батша хөкүмәте

**ЦА́РСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** батша ...ы **2.** (*величественный*) ғорур, мөһабәт, мәғрур, олпат; **ца́рственная оса́нка** олпат буй-һын

**ЦА́РСТВО** *с* **1.** (*государство*) батшалыҡ **2.** (*правление какого-л. царя*) батшалыҡ итеү; **в ца́рство Ива́на Гро́зного** Иван Грозный батшалыҡ иткәндә **3.** *чего, какое*; *перен.* донъя; **ца́рство живо́тных** хайуандар донъяһы

**ЦА́РСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** батшалыҡ итеү, батша булыу **2.** *перен. см.* **цари́ть** 2; **ца́рствует тишина́** тынлыҡ хөкөм һөрә

**ЦАРЬ** *м*; *прям., перен.* батша, падишаһ; **сверже́ние царя́** батшаны ҡолатыу; **царь звере́й** хайуандар батшаһы ♦ **царь небе́сный** Алла; **о́лух царя́ небе́сного** *см.* **о́лух**; **нет царя́ в голове́**; **без царя́ в голове́** *кто* аҡылһыҙ, алйот; **при царе́ Горо́хе** *шутл. см.* **горо́х**

**ЦВЕСТИ́** *несов.* **1.** сәскә атыу, сәскәләнеү; **я́блоня цветёт** алмағас сәскә ата **2.** (*о физическом расцвете*) сәскә атыу, сәскә кеүек булыу, таҙа (сәләмәт) булыу; **цвести́ зави́дным здоро́вьем** көнләшерлек сәләмәт булыу **3.** *перен.* (*процветать, успешно развиваться*) сәскә атыу, алға китеү (барыу), үҫеү **4.** *разг.* (*о водоёме*) йәшелләнеү, үңәҙләнеү, үңәҙ менән ҡапланыу; **пруд цветёт** быуа йәшелләнә; **вода́ в бо́чке цветёт** мискәләге һыу үңәҙләнә **5.** *обл.* (*покрываться сыпью*) сабыртма (сәбертмә) сығыу, сабыртыу, сәбертеү

**ЦВЕТ I** *м* (*окраска*) төҫ; **кра́сный цвет** ҡыҙыл төҫ ♦ **ви́деть всё в ро́зовом цве́те (све́те)** *см.* **ро́зовый**

**ЦВЕТ II** *м* **1.** *обычно мн.* **цветы́**; *прост. см.* **цвето́к**; **живы́е цветы́** тере сәскәләр; **ли́повый цвет** йүкә сәскәһе **2.** *чего*; *перен.* (*лучшая часть чего-л.*) алдынғы (иң яҡшы) вәкилдәр, юғары ҡатлам; **цвет нау́ки** фәндең алдынғы вәкилдәре; **цвет о́бщества** йәмғиәттең юғары ҡатламы **3.** (*период цветения у растений*) сәскә атыу (осоро), сәскәлә (булыу, ултырыу); **ви́шни в цвету́** сейәләр сәскәлә ултыра ♦ **дать цвет** сәскә атыу; **в (во) цве́те лет (сил)** йәш ваҡытта, шәп саҡта, ғүмерҙең сәскә атҡан мәлендә

**ЦВЕТА́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **цвети́стый** 2, 3; **цвета́стое пла́тье** биҙәкле күлдәк

**ЦВЕТЕ́НИЕ** *с см.* **цвести́**

**ЦВЕТИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*покрытый цветами*) сәскәле; **цвети́стые луга́** сәскәле болондар **2.** (*имеющий узор из цветов*) сәскәле; **цвети́стая шаль** сәскәле шәл **3.** (*разноцветный*) сыбар, төрлө төҫлө, биҙәкле **4.** *перен.* (*о слоге, речи и т.п.*) ҡабарынҡы, күперек; **цвети́стая речь** ҡабарынҡы телмәр

**ЦВЕТКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *бот.* сәскәле; **цветко́вые расте́ния** сәскәле үҫемлектәр

**ЦВЕТНИ́К** *м* сәскәлек, сәскә түтәле, гөл баҡсаһы, гөлзар

**ЦВЕТНО́Й,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* төҫлө; **цветно́й каранда́ш** төҫлө ҡәләм; **цветно́й фильм** төҫлө фильм; **цветна́я фотогра́фия** төҫлө фотография; **цветна́я металлурги́я** төҫлө металлургия **2.** (*разноцветный*) сыбар, төрлө төҫлө, биҙәкле **3.** (*принадлежащий не к белой расе*) төҫлө, төҫлө тәнле; **цветно́е населе́ние Аме́рики** Американың төҫлө тәнле кешеләре ♦ **цветна́я капу́ста** сәскәле кәбеҫтә; **цветны́е мета́ллы** төҫлө металдар

**ЦВЕТО... I** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "төҫ" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **цветочувстви́тельный** төҫ һиҙеүсән

**ЦВЕТО... II** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "сәскә" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **цветое́д** сәскә ашар ҡуңыҙ

**ЦВЕТОВО́Д** *м* сәскәсе (*сәскә (гөл) үҫтереүсе*)

**ЦВЕТОВО́ДСТВО** *с* **1.** (*разведение цветов*) сәскәселек, сәскә (гөл) үҫтереү **2.** (*хозяйство, занимающееся разведением цветов*) сәскәселек (сәскә үҫтереү) хужалығы

**ЦВЕТОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сәскәселек ...ы, сәскә (гөл) үҫтереү ...ы; **цветово́дческое хозя́йство** сәскәселек хужалығы

**ЦВЕТОВО́Й,** -ая, -ое төҫ(тәр) ...ы; **цветова́я га́мма** төҫтәр гаммаһы; **цветовы́е отте́нки** төҫ төҫмөрҙәре ♦ **цветова́я слепота́** төҫтө айыра алмау

**ЦВЕТО́К** *м* **1.** (*мн.* **цветы́** и *спец.* **цветки́**) сәскә; **цвето́к я́блони** алма сәскәһе; **же́нский цвето́к** инә сәскә **2.** (*мн.* **цветы́**) сәскә, гөл; **полевы́е цветы́** ялан сәскәләре; **ко́мнатный цвето́к** бүлмә гөлө; **живы́е цветы́** тере сәскәләр; **собира́ть цветы́** сәскә йыйыу ♦ **тепли́чный цвето́к** *см.* **тепли́чный**

**ЦВЕТОЛО́ЖЕ** *с*; *бот.* сәскә төбө

**ЦВЕТОНО́ЖКА** *ж*; *бот.* сәскә һабағы

**ЦВЕТОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое *бот.* сәскәле, сәскә ата торған; **цветоно́сные расте́ния** сәскә ата торған үҫемлектәр; **цветоно́сный сте́бель** сәскәле һабаҡ

**ЦВЕТО́ЧЕК** *м*; *уменьш.-ласк. от* **цвето́к** ♦ **э́то то́лько (ещё) цвето́чки** күрәсәгең алда әле

**ЦВЕТО́ЧНИЦА** *ж* **1.** сәскә һатыусы **2.** (*работница, изготовляющая искусственные цветы*) яһалма сәскә эшләүсе (әҙерләүсе)

**ЦВЕТО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сәскә (гөл) ...ы; **цвето́чные семена́** сәскә орлоҡтары; **цвето́чная по́чка** сәскә бөрөһө; **цвето́чная клу́мба** гөл түтәле; **цвето́чный магази́н** сәскә магазины **2.** (*приготовленный из цветов, имеющий запах цветов*) сәскә ...ы, сәскәнән (яһалған); **цвето́чный одеколо́н** сәскәнән яһалған одеколон ♦ **цвето́чный чай** сәскә сәйе (*сәй ҡыуағы бөрөләренән йыйылған иң яҡшы сортлы сәй*)

**ЦВЕТУ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **цвести́** **2.** *прил.* сәскә кеүек, тап-таҙа, дәрте ташып торған; **цвету́щая же́нщина** сәскә кеүек ҡатын **3.** *прил.* (*успешно развивающийся*) сәскә атҡан, алға киткән; **цвету́щая респу́блика** сәскә атҡан республика

**ЦЕ́ВКА** *ж* **1.** *тех.* сүре, кәтүк **2.** (*катушка на веретене*) баш **3.** *анат.* (*кость*) бәкәл һөйәге (*ҡоштарҙа һ.б.*)

**ЦЕВЬЁ** *с*; *спец.* **1.** көбәк нигеҙе (*мылтыкта*) **2.** (*стержень чего-л.*) һап; **цевьё безме́на** бизмән һабы

**ЦЕДИ́ЛКА** *ж*; *разг.* һөҙгөс, иләк; **цеди́лка для молока́** һөт һөҙгөс

**ЦЕДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һөҙгөс, һөҙә торған, һөҙөү ...ы; **цеди́льная маши́на** һөҙгөс машина

**ЦЕДИ́ТЬ** *несов. что* **1.** һөҙөү, һарҡытыу; **цеди́ть молоко́ че́рез цеди́лку** һөттө һөҙгөс аша һөҙөү **2.** (*медленно наливать*) әкрен (генә) ағыҙыу (ҡойоу) **3.** *разг.* (*медленно пить*) яйлап (ҡына) эсеү; **цеди́ть чай** сәйҙе яйлап эсеү **4.** *разг.* теш араһынан сығарып һөйләү (әйтеү), иренеп кенә һөйләү, мыңғырлау; **цеди́ть слова́** һүҙҙе теш араһынан сығарып әйтеү

**ЦЕ́ДРА** *ж* ҡабыҡ (*цитрус емештәренең*)

**ЦЕ́ЗИЙ** *м* цезий (*химик элемент, металл*)

**ЦЕЗУ́РА** *ж*; *лит., муз.* цезура (*шиғыр юлындағы һәм көйҙәге пауза*)

**ЦЕЙТНО́Т** *м* цейтнот; **находи́ться в цейтно́те** цейтнотҡа эләгеү

**ЦЕЛЕ́БНОСТЬ** *ж* шифалылыҡ, сихәтлек (*һаулыҡ өсөн файҙалы булыу*); **целе́бность минера́льного исто́чника** минераль сығанаҡтың шифалылығы

**ЦЕЛЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое шифалы, сихәтле, дауалай торған, һауыҡтырғыс; **целе́бный напи́ток** шифалы эсемлек; **целе́бная трава́** дауалай торған үлән

**ЦЕЛЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** (*предназначенный для определённой цели*) маҡсатлы, маҡсатҡа йүнәлтелгән; **целево́е финанси́рование** маҡсатҡа йүнәлтелгән финанслау **2.** (*направленный на осуществление цели*) маҡсат ...ы, маҡсатҡа ярашлы; **целево́е зада́ние** маҡсатҡа ярашлы эш

**ЦЕЛЕНАПРА́ВЛЕННОСТЬ** *ж* маҡсатлылыҡ, маҡсатлы булыу, маҡсатҡа йүнәлтелгәнлек; **целенапра́вленность де́йствий** эш-хәрәкәттең маҡсатҡа йүнәлтелгәнлеге

**ЦЕЛЕНАПРА́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое маҡсатлы, маҡсатҡа йүнәлтелгән; **целенапра́вленная де́ятельность** маҡсатлы эшмәкәрлек

**ЦЕЛЕСООБРА́ЗНОСТЬ** *ж* маҡсатҡа ярашлы булыу, маҡсатҡа тап (тура) килеү; **целесообра́зность мероприя́тий** саралар҇ың маҡсатҡа ярашлы булыуы

**ЦЕЛЕСООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое маҡсатҡа ярашлы, маҡсатҡа тап (тура) килгән; **целесообра́зное испо́льзование де́нег** аҡсаны маҡсатҡа ярашлы тотоноу

**ЦЕЛЕУСТРЕМЛЁННОСТЬ** *ж* маҡсатҡа ынтылышлы булыу, маҡсатлы булыу, маҡсатҡа йүнәлтелгәнлек, маҡсатлылыҡ; **тре́бовать целеустремлённости** маҡсатлы булыуҙы талап итеү

**ЦЕЛЕУСТРЕМЛЁННЫЙ,** -ая, -ое маҡсатҡа ынтылышлы, маҡсатҡа йүнәлтелгән, маҡсатлы; **целеустремлённая во́ля** маҡсатҡа ынтылышлы ихтыяр; **целеустремлённая рабо́та** маҡсатҡа йүнәлтелгән эш

**ЦЕ́ЛИК** *м*; *воен.* тоҫҡама (*атыу ҡоралының көбәгенә тоҫҡау өсөн ҡуйылған ябай ҡулайлама*)

**ЦЕЛИКО́М** *нареч.* **1.** (*в целом виде*) тотош, тотошлай, тотош көйө, бөтөн көйө (килеш); **зажа́рить ку́рицу целико́м** тауыҡты тотош көйө ҡыҙҙырыу **2.** (*безраздельно, совершенно*) тулыһынса, бөтөнләй, бөтөнләй, тулыһы менән, бөтөнләйе менән; **целико́м отдава́ться люби́мому де́лу** тулыһынса яратҡан эшкә бирелеү ♦ **целико́м и по́лностью** тотош, тулыһынса, бар булмышы менән

**ЦЕЛИНА́** *ж* сиҙәм, сиҙәм ер, сиҙәмлек; **освое́ние целины́** сиҙәм үҙләштереү; **распаха́ть целину́** сиҙәмлекте һөрөү

**ЦЕЛИ́ННИК** *м* сиҙәм күтәреүсе, сиҙәмсе

**ЦЕЛИ́ННЫЙ,** -ая, -ое сиҙәм, сиҙәм ер ...ы; **цели́нные зе́мли** сиҙәм ерҙәр

**ЦЕЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **целе́бный**

**ЦЕ́ЛИТЬ** *несов.* **1.** *см.* **це́литься 2.** *перен.* (*делать объектом сатиры и т.п.*) күҙ уңында тотоу, ишара итеү; **в кого́ це́лит спекта́кль?** спектакль нимәгә ишара итә? **3.** *перен.* (*метить*) -ға/-гә иҫәп тотоу (ынтылыу); **це́лить в аспиранту́ру** аспирантураға инергә ынтылыу; **це́лить в председа́тели** рәйеслеккә иҫәп тотоу

**ЦЕ́ЛИТЬСЯ** *несов.* күҙәү, төбәү, төҙәү, тоҫҡау; **це́литься из ружья́** мылтыҡ төҙәү; **це́литься в мише́нь** сәпкә тоҫҡау

**ЦЕЛКО́ВЫЙ: целко́вый рубль** *уст.* бер һум

**ЦЕЛЛОФА́Н** *м* целлофан

**ЦЕЛЛОФА́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** целлофан ...ы; **целлофа́новый цех** целлофан цехы **2.** целлофан, целлофандан (яһалған); **целлофа́новая упако́вка** целлофандан көплөк

**ЦЕЛЛУЛО́ИД** *м* целлулоид (*нитроцеллюлозанан яһалған ҡаты пластик матдә*)

**ЦЕЛЛУЛО́ИДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** целлулоид ...ы; **целлуло́идная ма́сса** целлулоид массаһы **2.** целлулоид, целлулоидтан (яһалған); **целлуло́идные игру́шки** целлулоидтан яһалған уйынсыҡтар

**ЦЕЛЛУЛО́ИДОВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **целлуло́идный**

**ЦЕЛЛЮЛО́ЗА** *ж* целлюлоза (*ҡағыҙ, яһалма ебәк һәм шартлатҡыс нәмәләр эшләүгә китә торған ағастан һ.б. алынған матдә*)

**ЦЕЛЛЮЛО́ЗНО-БУМА́ЖНЫЙ: целлюло́зно-бума́жный комбина́т** целлюлоза-ҡағыҙ комбинаты; **целлюло́зно-бума́жная промы́шленность** целлюлоза-ҡағыҙ сәнәғәте

**ЦЕЛЛЮЛО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое целлюлоза, целлюлоза ...ы; **целлюло́зное произво́дство** целлюлоза етештереү

**ЦЕЛОВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **целова́ть, целова́ться 2.** *см.* **кре́стное целова́ние** ♦ **кре́стное целова́ние** *см.* **кре́стный**

**ЦЕЛОВА́ТЬ** *несов. кого-что* үбеү; **целова́ть ребёнка** баланы үбеү; **целова́ть в гу́бы** ирендән үбеү

**ЦЕЛОВА́ТЬСЯ** *несов.* үбешеү

**ЦЕЛОМУ́ДРЕННОСТЬ** *ж см.* **целому́дрие**

**ЦЕЛОМУ́ДРЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*девственный*) ғиффәтле, саф **2.** (*нравственный*) инсафлы, әхлаҡлы; **целому́дренный о́браз жи́зни** әхлаҡлы йәшәү тәртибе

**ЦЕЛОМУ́ДРИЕ** *с* **1.** (*девственность*) ғиффәтлелек, сафлыҡ **2.** (*строгая нравственность*) инсафлыҡ, әхлаҡлылыҡ; **целому́дрие мы́слей** уй-фекерҙәрҙең инсафлығы

**ЦЕ́ЛОСТНОСТЬ** *ж* (бер) бөтөнлөк, теүәллек, тулылыҡ, тамамланғанлыҡ; **це́лостность органи́зма** организмдың бер бөтөнлөгө; **территориа́льная це́лостность** территориаль бөтөнлөк

**ЦЕ́ЛОСТНЫЙ,** -ая, -ое (бер) бөтөн, теүәл, тулы; **це́лостное впечатле́ние** тулы тәьҫир

**ЦЕ́ЛОСТЬ** *ж* **1.** (*неповреждённое состояние чего-л.*) бөтөнлөк, теүәллек, именлек, иҫән-һаулыҡ **2.** (*внутреннее единство*) бөтөнлөк, тамамланғанлыҡ, тулылыҡ, теүәллек ♦ **в це́лости и сохра́нности** имен-аман көйөнсә, иҫән-һау, теүәл

**ЦЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*полный, непочатый*) тулы (бер), теүәл (бер), бөтөн (бер), башланмаған, тейелмәгән; **це́лый пиро́г** бөтөн бер бәлеш **2.** (*в полном составе*) тотош, бөтә, тулы; **е́здить це́лыми се́мьями** тотош ғаилә менән йөрөү **3.** буйы, теүәл (бер), тулы (бер), бөтөн, бөтә; **це́лый день** көнө буйы; **ждать це́лый час** теүәл бер сәғәт көтөү; **це́лый го́род** бөтөн ҡала; **в це́лом ми́ре** бөтә донъяла **4.** *разг.* (*настоящий*) ысын; **це́лое собы́тие** ысын ваҡиға **5.** *в знач. сущ.* **це́лое** *с* (*нечто единое*) бер бөтөн, тулы бер; **респу́блика составля́ет еди́ное це́лое** республика бер бөтөн булып тора **6.** (*неповреждённый, невредимый*) бөтөн, теүәл, иҫән, имен, зыян-зарарһыҙ, ватылмаған; **всё бы́ло це́ло** бөтәһе лә теүәл ине; **оста́ться це́лым** иҫән ҡалыу; **сапоги́ бы́ли це́лые** итектәр бөтөн ине **7.** (*не пропавший*) иҫән-һау, имен, иҫән, юғалмаған; **архи́в отделе́ния цел** бүлектең архивы имен **8.** *мат.* бөтөн; **це́лое число́** бөтөн һан **9.** *в знач. сущ.* **це́лое** *с*, **це́лая** *ж*; *мат.* бөтөн; **одна́ це́лая шесть деся́тых** бер бөтөн ундан алты ♦ **в о́бщем и це́лом** *см.* **о́бщий**; **це́лая ве́чность** мәңгелек, бик оҙаҡ ваҡыт; **це́лый ко́роб (весте́й, новосте́й и т.п.)** *см.* **ко́роб**; **це́лый и невреди́мый**; **цел и невреди́м** иҫән-һау, имен-аман

**ЦЕЛЬ** *ж* **1.** сәп, мәрәй; **попа́сть в цель** сәпкә тейҙереү **2.** маҡсат, морат, теләк; **с како́й це́лью** ниндәй маҡсат менән; **дости́гнуть це́ли** моратҡа ирешеү ♦ **с це́лью**; **в це́лях** *чего нимәгәлер* тип, *нимәгәлер* иҫәп тотоп, *нимәлер* өсөн, *ниндәйҙер* маҡсат менән; **бить в цель** маҡсатҡа (теләгәнгә) ирешеү; **име́ть це́лью (цель)** маҡсат итеп ҡуйыу (тотоу), маҡсатҡа ынтылыу (тырышыу)

**ЦЕЛЬНО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "бөтөн", "тотош" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **цельноко́рпусный** тотош корпуслы; **цельнокро́еный** тотош ҡырҡылған

**ЦЕЛЬНОМЕТАЛЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тотош металл ...ы, тотош металдан эшләнгән; **цельнометалли́ческий ваго́н** тотош металдан эшләнгән вагон

**ЦЕ́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** бөтөнлөк, тотошлоҡ; **це́льность террито́рии** территорияның бөтөнлөгө **2.** бөтөнлөк, тамамланғанлыҡ, тулылыҡ, теүәллек; **це́льность о́браза** образдың тулылығы

**ЦЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*состоящий из одного куска*) бөтөн, тотош, бер киҫәктән торған; **це́льный рези́новый шланг** бер киҫәктән торған резина шланг **2.** (бер) бөтөн, тамамланған, берҙәм, тулы; **це́льный хара́ктер** бер бөтөн характер **3.** (*неразбавленный, натуральный*) таҙа, тәбиғи һыу ҡушылмаған, шыйығайтылмаған, айыртылмаған; **це́льное вино́** таҙа шарап; **це́льное молоко́** айыртылмаған һөт

**ЦЕ́ЛЬСИЙ: шкала́ Це́льсия** Цельсий шкалаһы (*һыуҙың туңыу нөктәһенән ҡайнау нөктәһенә тиклем 100 градусҡа бүленгән термометр*)

**ЦЕМЕ́НТ** *м* цемент; **завезти́ на стро́йку цеме́нт** төҙөлөшкә цемент килтереү

**ЦЕМЕНТА́ЦИЯ** *ж* **1.** *тех.* цементлау, цементлап нығытыу; **цемента́ция скважи́ны** скважинаны цементлап нығытыу **2.** *тех.* цементациялау, сыныҡтырыу; **твёрдая цемента́ция** ҡаты сыныҡтырыу; **га́зовая цемента́ция** газ менән цементациялау **3.** *геол.* ҡатыу, цементлашыу

**ЦЕМЕНТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** *тех.* цементлау, цементлап нығытыу; **цементи́ровать доро́жку** юлды цементлау **2.** *тех.* цементациялау, сыныҡтырыу; **цементи́ровать сталь** ҡоросто сыныҡтырыу **3.** *перен.* (*сплотить*) нығытыу, берләштереү; **цементи́ровать дру́жбу** дуҫлыҡты нығытыу

**ЦЕМЕНТИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.*; *тех.* (*подвергнуться цементации*) цементланыу; (*о стали*) сынығыу **2.** *несов. страд. от* **цементи́ровать**

**ЦЕМЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** цемент ...ы; **цеме́нтный заво́д** цемент заводы **2.** цемент, цемент ...ы; **цеме́нтный раство́р** цемент иретмәһе; **цеме́нтный пол** цемент иҙән

**ЦЕНА́** *ж* **1.** хаҡ; **госуда́рственная цена́** дәүләт хаҡы; **сниже́ние цен на продово́льственные това́ры** аҙыҡ-түлек тауарҙарына хаҡ төшөү; **стабилиза́ция цен** хаҡтарҙың тотороҡланыуы **2.** (*плата за что-л.*) хаҡ, түләү; **цена́ за прока́т** прокат өсөн хаҡ **3.** *перен.* (*ценность, достоинство*) баһа, ҡиммәт, ҡәҙер; **знать це́ну вре́мени** ваҡыттың ҡәҙерен белеү **4.** *в твор. п.* **цено́ю** *чего* (ҡорбан) итеп, (ҡорбандар) биреп; **цено́ю неслы́ханных же́ртв** ишетелмәгән ҡорбандар биреп; **цено́ю своего́ сча́стья** үҙ бәхетен ҡорбан итеп ♦ **в цене́** бик ҡиммәт, юғары баһалы; **дорого́й цено́й** *см.* **дорого́й**; **любо́й цено́й** нисек кенә булһа ла, теләһә ниндәй юл менән; **знать це́ну** *см.* **знать** I; **наби́ть себе́ це́ну** *см.* **наби́ть**; **грош цена́** *см.* **грош**; **цены́ нет**: 1) *чему* бик ҡиммәт; 2) *кому* баһалап бөтөргөһөҙ, тиңе юҡ

**ЦЕНЗ** *м* ценз (**1.** *халыкты сәйәси хокуктан сикләй торған шарттар* **2.** *икт. статистик һан алыу* **3.** *махс. предприятиены билдәле бер разрядка индерец өсөн кәрәкле шарттар*); **возрастно́й ценз** йәш цензы; **иму́щественный ценз** милек цензы

**ЦЕ́НЗОР** *м* цензор; **служи́ть це́нзором** цензор булып хеҙмәт итеү

**ЦЕ́НЗОРСКИЙ,** -ая, -ое цензорлык ...ы, цензор ...ы; **це́нзорские замеча́ния** цензор иҫкәртмәләре

**ЦЕ́НЗОРСТВО** *с* цензорлык

**ЦЕНЗУ́РА** *ж* цензура (**1.** *Боронғо Римда цензор вазифаһы* **2.** *матбуғатты, киң информация сараларын күҙәтеүҙең дәүләт системаһы һәм шул эште башкарған дәүләт ойошмаһы*); **вое́нная цензу́ра** хәрби цензура; **пи́сьма прохо́дят че́рез цензу́ру** хаттар цензура аша үтә

**ЦЕНЗУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** цензура ...ы; **цензу́рный уста́в** цензура уставы **2.** цензураға каршы килмәгән (ярашлы); **вполне́ цензу́рное выраже́ние** цензураға каршы килмәгән һүҙ

**ЦЕНИ́ТЕЛЬ** *м* баһалаусы, баһалай (кәҙерен) белеүсе, баһа бирә белеүсе; **цени́тель иску́сства** сәнғәтте баһалай белеүсе

**ЦЕНИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*определять цену*) хак куйыу (билдәләү, биреү), баһалау, баһа биреү; **до́рого цени́ть** киммәт хак биреү **2.** (*давать оценку кому-чему-л.*) баһалау, баһа биреү; **цени́ть люде́й по посту́пкам** кешеләрҙе эшенә карап баһалау **3.** *что* (*дорожить*) кәҙерен белеү, баһалау, хөрмәт (ихтирам) итеү; **цени́ть дру́жбу** дуҫлыктың кәҙерен белеү; **цени́ть по заслу́гам** хеҙмәттәренә карап баһалау

**ЦЕНИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*иметь цену*) баһаланыу, хак куйылыу; **цени́ться в миллио́н рубле́й** миллион һумға баһаланыу; **цени́ться дёшево** арзан хак куйылыу **2.** (*признаваться важным, ценным*) баһаланыу, хөрмәткә лайык булыу **3.** *страд. от* **цени́ть**

**ЦЕ́ННИК** *м* хактар күрһәткесе, хактар белешмәһе

**ЦЕ́ННОСТЬ** *ж* **1.** хак, баһа; **вещь высо́кой це́нности** юғары баһалы әйбер; **посы́лка с объя́вленной це́нностью** хакы күрһәтелгән посылка **2.** (*значимость*) әһәмиәт, киммәт; **це́нность нау́чной рабо́ты** фәнни хеҙмәттең әһәмиәте **3.** (*ценный предмет*) байлык, хазина, киммәтле нәмә; **хране́ние це́нностей** киммәтле нәмәләрҙе һаклау **4.** *обычно мн.* **це́нности** байлык(тар), хазина(лар); **материа́льные и духо́вные це́нности** матди һәм рухи хазиналар; **це́нности иску́сства** сәнғәт байлыктары

**ЦЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*имеющий цену*) баһалы, хакы куйылған (билдәләнгән, күрһәтелгән); **це́нная посы́лка** хакы күрһәтелгән посылка **2.** (*дорогой*) киммәтле; **це́нный пода́рок** киммәтле бүләк **3.** *перен.* әһәмиәтле, киммәтле, кәрәкле, мөһим; **це́нный докуме́нт** әһәмиәтле документ; **це́нное откры́тие** мөһим асыш ♦ **це́нные бума́ги** *см.* **бума́га**

**ЦЕНТ** *м* цент (*АКШ-та һәм кайһы бер башка илдәрҙә акса берәмегенең йөҙҙән бер өлөшөнә тигеҙ вак акса*)

**ЦЕ́НТНЕР** *м* центнер; **пять це́нтнеров пшени́цы** биш центнер бойҙай

**ЦЕНТР** *м*; *в разн. знач.* үҙәк, урта; **центр ша́ра** шар үҙәге; **центр кру́га** түңәрәк үҙәге; **областно́й центр** өлкә үҙәге; **нау́чный центр** ғилми үҙәк; **культу́рный центр** мәҙәниәт үҙәге; **промы́шленный центр** сәнәғәт үҙәге; **директи́вы це́нтра** үҙәк директивалары; **в це́нтре внима́ния** иғтибар үҙәгендә; **в це́нтре страны́** илдең уртаһында; **жить в це́нтре го́рода** кала үҙәгендә йәшәү ♦ **центр тя́жести** *см.* **тя́жесть**

**ЦЕНТРА́Л** *м* централ (*революцияға тиклем Рәсәйҙә үҙәк төрмә*)

**ЦЕНТРАЛИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **централизова́ть, централизова́ться**

**ЦЕНТРАЛИ́ЗМ** *м*; *полит.* централизм (*үҙәкләштерелгән идара системаһы*) ♦ **демократи́ческий централи́зм** демократик централизм (*коммунистар партияһын ойоштороу төҙөлөшөнөң етәксе принцибы*)

**ЦЕНТРАЛИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **централизова́ть** **2.** *прил.* (*сосредоточенный в центре*) үҙәкләштерелгән, тупланған **3.** *прил.* (*исходящий из одного центра*) бер үҙәктән; **централизо́ванная пода́ча воды́** һыуҙы бер үҙәктән биреү ♦ **централизо́ванное госуда́рство** үҙәкләштерелгән дәүләт

**ЦЕНТРАЛИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. что* үҙәкләштереү, (бер урынға) туплау; **централизова́ть руково́дство** етәкселек итеүҙе үҙәкләштереү

**ЦЕНТРАЛИЗОВА́ТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* үҙәкләшеү, (бер урынға) тупланыу **2.** *несов. страд. от* **централизова́ть**

**ЦЕНТРАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое централизм ...ы; **централисти́ческие взгля́ды** централизм караштары

**ЦЕНТРА́ЛКА** *ж*; *разг.* централка (*мылтыктың бер төрө*)

**ЦЕНТРА́ЛЬ** *ж* централь (*үҙәк магистраль*); **отопи́тельная центра́ль** йылытыу централе

**ЦЕНТРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҙәк, үҙәктәге, урта(лағы); **центра́льная у́лица** үҙәк урам; **центра́льный райо́н** үҙәк район **2.** (*руководящий*) үҙәк; **центра́льный комите́т профсою́зов** профсоюздарҙың үҙәк комитеты **3.** (*основной*) үҙәк, төп; **центра́льный вопро́с** төп мәсьәлә **4.** (*обслуживающий систему чего-л.*) үҙәкләштерелгән; **центра́льное отопле́ние** үҙәкләштерелгән йылытыу системаһы ♦ **центра́льная не́рвная систе́ма** *физиол.* үҙәк нервы системаһы; **центра́льный у́гол** *мат.* үҙәк мөйөш

**ЦЕНТРИ́ЗМ** *м* центризм, урталык

**ЦЕНТРИ́РОВАНИЕ** *с см.* **центри́ровать**

**ЦЕНТРИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что*; *тех.* **1.** үҙәккә тура килтереү, үҙәккә урынлаштырыу, үҙәген тура килтереү; **центри́ровать топографи́ческий инструме́нт** топографик инструментты үҙәккә урынлаштырыу **2.** *см.* **центрова́ть**

**ЦЕНТРИФУ́ГА** *ж*; *тех.* центрифуга (**1.** *аппарат* **2.** *ҡоролма*)

**ЦЕНТРОБЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* үҙәктән ситкә ынтылыу(сы) (ҡасыусы, ынтыла торған), үҙәктән ситкә ынтылыу ...ы, үҙәктән ҡыуыусы; **центробе́жная си́ла** үҙәктән ситкә ынтылыусы көс; **центробе́жный аппара́т** үҙәктән ҡыуыусы аппарат

**ЦЕНТРОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* үҙәк тишеү ...ы; **центрова́льный стано́к** үҙәк тишеү станогы

**ЦЕНТРОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. что*; *тех.* үҙәк тишеү

**ЦЕНТРОСТРЕМИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* үҙәккә ынтылыусы, үҙәккә ынтылыу ...ы; **центростреми́тельное движе́ние** үҙәккә ынтылыусы хәрәкәт; **центростреми́тельная си́ла** үҙәккә ынтылыу көсө

**ЦЕП** *м* шыбағас; **колоти́ть цепо́м** шыбағас менән һуғыу

**ЦЕПЕНЕ́ТЬ** *несов.* ҡатыу, ҡатып ҡалыу; **цепене́ть от хо́лода** һыуыҡтан ҡатыу; **цепене́ть от у́жаса** ҡурҡыуҙан ҡатып ҡалыу

**ЦЕ́ПКИЙ,** -ая, -ое **1.** эләктереүсән, эләктереп ала (ысҡындырмай) торған, нығ (ҡаты) тотҡан; **це́пкие ко́гти** эләктереүсән тырнаҡтар; **це́пкие ру́ки** нығ тотҡан ҡулдар **2.** (*вязкий — о веществе*) йәбешкәк, үҙле; **по́чва гли́ниста и це́пка** тупраҡ балсыҡлы һәм йәбешкәк **3.** *перен.* (*быстро схватывающий окружающее*) зирәк, тиҙ төшөнә торған; **це́пкий ум** зирәк аҡыл **4.** *перен.*, *разг.* ныҡыш, ныҡышмал, еңмеш; **це́пкий челове́к** ныҡыш кеше; **быть це́пким** ныҡышмал булыу

**ЦЕ́ПКОСТЬ** *ж* **1.** эләктереүсәнлек, эләктереп алыу, нығ (ҡаты) тотоу; **це́пкость руки́** ҡулдың нығ тотоуы **2.** йәбешкәклек, үҙлелек; **це́пкость вещества́** матдәнең йәбешкәклеге **3.** *перен.* зирәклек, тиҙ төшөнөп алыусанлыҡ; **це́пкость воображе́ния** уйҙың зирәклеге **4.** *перен.* ныҡышлыҡ, ныҡышмаллыҡ, еңмешлек

**ЦЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *за что* (*задевать*) йәбешеү, эләгеү, һарылыу; **цепля́ться за су́чья** ботаҡтарға йәбешеү **2.** *за кого-что* (*хвататься*) тотоноу, аҫылыныу, эләктереп (тотоп) алыу; **ру́ки цепля́лись за что́-то о́строе** ҡулдар ниндәйҙер осло нәмәне тотоп алды **3.** *за что*; *перен.*, *разг.* тырмашып (йәбешеп) ятыу; **цепля́ться за жизнь** йәшәргә тырмашып ятыу **4.** *к кому-чему*, *за кого-что*; *перен.*, *прост.* (*придираться*) бәйләнеү; **цепля́ться по пустяка́м** бушҡа бәйләнеү

**ЦЕПНО́Й,** -ая, -ое **1.** сынйыр ...ы, сылбыр ...ы; **цепно́е звено́** сынйыр быуыны **2.** сылбырлы; **цепно́й мост** сылбырлы күпер **3.** сылбырҙағы, сынйырҙағы, бәйҙәге; **цепна́я соба́ка** бәйҙәге эт **4.** (*следующий один за другим*) сылбырлы, сылбыр кеүек; **цепно́е расположе́ние заклёпок** сигәнең сылбыр кеүек урынлашыуы; **цепны́е рефле́ксы** сылбырлы рефлекстар ♦ **цепна́я ли́ния** *мат.* сылбырлы һыҙыҡ; **цепна́я реа́кция** *физ.*, *хим.* сылбырлы реакция

**ЦЕПНО́Й II,** -ая, -ое шыбағас ...ы; **цепно́е би́ло** шыбағас туҡмағы

**ЦЕПО́ЧКА** *ж* **1.** (ваҡ, нәҙек) сылбыр (сынйыр); **часы́ с цепо́чкой** сылбырлы сәғәт **2.** (*вереница кого-чего-л.*) рәт, теҙем; **цепо́чка огне́й** уттар теҙеме; **цепо́чка маши́н** машиналар рәте **3.** *в знач. нареч.* **цепо́чкой** бер-бер артлы; **дви́гаться цепо́чкой** бер-бер артлы хәрәкәт итеү

**ЦЕПЬ** *ж* **1.** сылбыр, сынйыр; **я́корная цепь** якорь сынйыры; **спусти́ть соба́ку с цепи́** этте сылбырҙан ысҡындырыу **2.** *мн.* **це́пи**; *прям.*, *перен.* бығау; **закова́ть в це́пи** бығау кейҙереү; **це́пи ра́бства** ҡоллоҡ бығауҙары; **разорва́ть це́пи** бығауҙан арыныу **3.** (*ряд, вереница*) теҙем, теҙмә; **цепь гор** тауҙар теҙмәһе **4.** *воен.* сынйыр, цепь, теҙем; **стрелко́вая цепь** уҡсылар (атыусылар) теҙеме **5.** *в знач. нареч.* **це́пью** сынйыр (сылбыр, цепь, теҙем) булып (кеүек), теҙелеп; **наступа́ть це́пью** теҙелеп һөжүм итеү ♦ **как (бу́дто, сло́вно) с цепи́ сорва́лся** *см.* **сорва́ться**

**ЦЕ́РБЕР** *м* цербер (**1.** *боронғо грек мифологияһында ер аҫты батшалығын һаҡлаусы уҫал эт* **2.** *кцсм. һиҙгер һәм рәхимһеҙ һаҡсы*)

**ЦЕРЕБРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *анат.* мейе ...ы; **церебра́льная жи́дкость** мейе шыйыҡсаһы **2.** *лингв.* церебраль (*тел осон аңҡауға тартып әйтелә торған*); **церебра́льные согла́сные** церебраль тартынҡылар

**ЦЕРЕМОНИА́Л** *м* церемониал, тантана; **прое́кт церемониа́ла** тантананың проекты

**ЦЕРЕМОНИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое церемониал, тантаналы; **церемониа́льные та́нцы** тантаналы бейеүҙәр

**ЦЕРЕМО́НИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*вести себя церемонно*) тартыныу, тартынып тороу, ҡыҫтатыу; **проси́ть не церемо́ниться** тартынмауҙы үтенеү **2.** *с кем-чем* и *без доп.* (*проявлять излишнюю щепетильность*) наҙланып тороу, тартынып тороу, иҫәпләшеү; **напра́сно церемо́ниться** бушҡа наҙланып тороу

**ЦЕРЕМО́НИЯ** *ж* **1.** церемония, йола, тантана; **сва́дебная церемо́ния** туй йолаһы **2.** *обычно мн.* **церемо́нии**; *перен.*, *разг.* тартыныу, ҡыҫтатыу, наҙланыу, ҡыланыу; **дава́йте без церемо́ний!** әйҙәгеҙ, тартынып тормағыҙ! ♦ **кита́йские церемо́нии** *см.* **кита́йский**

**ЦЕРЕМО́ННОСТЬ** *ж* **1.** әҙәплелек, нәзәкәтлелек; **церемо́нность обраще́ния** мөғәмәлә итеүҙең әҙәплелеге **2.** ҡағиҙәгә (тәртипкә) ярашлылыҡ

**ЦЕРЕМО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*строгий в соблюдении принятого этикета*) үтә әҙәпле, нәзәкәтле; **церемо́нное обраще́ние** үтә әҙәпле мөғәмә-

лә **2.** (*отвечающий требованиям этикета*) ҡағиҙәгә (тәртипкә) ярашлы

**ЦЕРКО́ВНИК** *м* **1.** *см.* **церковнослужи́тель 2.** (*представитель духовенства*) дини (рухани) кеше **3.** *разг.* (*сторонник усиления влияния церкви*) дини кеше, дин яҡлы кеше

**ЦЕРКОВНОПРИХО́ДСКИЙ,** -ая, -ое сиркәү-мәхәллә ...ы ♦ **церковноприхо́дская шко́ла** сиркәү-мәхәллә мәктәбе (*революцияға тиклем Рәсәйҙә сиркәү ҡарамағындағы башланғыс мәктәп*)

**ЦЕРКОВНОСЛАВЯ́НСКИЙ,** -ая, -ое сиркәү-славян ...ы; **церковнославя́нская а́збука** сиркәү-славян әлифбаһы ♦ **церковнославя́нский язы́к** сиркәү-славян теле (*XI—XVII бб. көнсығыш һәм көньяҡ славяндарҙың әҙәби теле*)

**ЦЕРКОВНОСЛУЖИ́ТЕЛЬ** *м* сиркәү хеҙмәтсеһе, сиркәү кешеһе, сиркәү әһеле

**ЦЕРКО́ВНОСТЬ** *ж* динилек, сиркәү ҡағиҙәләре (ғөрөф-ғәҙәттәре)

**ЦЕРКО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сиркәү ...ы; **церко́вные воро́та** сиркәү ҡапҡаһы **2.** дин ...ы, дини, сиркәү ...ы; **церко́вная литерату́ра** дини әҙәбиәт; **церко́вные зе́мли** сиркәү ерҙәре ♦ **бе́ден как церко́вная мышь (кры́са)** бик ярлы; ауыҙын асһа, үпкәһе күренә

**ЦЕ́РКОВЬ** *ж* **1.** дин, сиркәү; **правосла́вная це́рковь** православие дине; **католи́ческая це́рковь** католик сиркәүе **2.** (*здание*) сиркәү

**ЦЕСАРЕ́ВИЧ** *м*; *ист.* тәхет вариҫы (*батшаның үҙенән һуң тәхеткә ултырырға тейешле улы*)

**ЦЕСАРЕ́ВНА** *ж* тәхет вариҫының ҡатыны

**ЦЕСА́РКА** *ж* цесарка, мысыр тауығы

**ЦЕХ** *м* **1.** (*мн.* **це́хи**) цех; **цех кузнецо́в** тимерселәр цехы **2.** (*мн.* **це́хи** и *разг.* **цеха́**) цех; **инструмента́льный цех** инструменталь цех; **ма́стер це́ха** цех мастеры

**ЦЕХОВО́Й,** -ая, -ое **1.** цех ...ы; **цеховы́е зако́ны** цех ҡанундары; **цехово́й ма́стер** цех мастеры **2.** *перен.* цех ...ы, бәләкәй төркөм ...ы, сикләнгән; **цеховы́е интере́сы** бәләкәй төркөм мәнфәғәттәре

**ЦЕХОВЩИ́НА** *ж*; *разг.* цехсылыҡ, бәләкәй төркөмсөлөк, сикләнгәнлек; **борьба́ с цеховщи́ной** сикләнгәнлек менән көрәшеү

**ЦИА́Н** *м*; *хим.* циан (*газ*)

**ЦИА́НИСТЫЙ,** -ая, -ое *хим.* цианлы; **циа́нистый ка́лий** цианлы калий

**ЦИА́НОВЫЙ,** -ая, -ое *хим.* циан ...ы; **циа́новая кислота́** циан кислотаһы

**ЦИАНО́З** *м*; *мед.* цианоз (*ҡайһы бер ауырыуҙар ваҡытында тән тиреһе күгәреү*)

**ЦИВИЛИЗА́ТОР** *м*; *обычно ирон.* цивилизатор, цивилизация урынлаштырыусы, мәҙәниәт таратыусы

**ЦИВИЛИЗА́ЦИЯ** *ж* цивилизация, мәҙәниәт; **анти́чная цивилиза́ция** антик мәҙәниәт; **разви́тие цивилиза́ции** цивилизация(ның) үҫеше

**ЦИВИЛИЗО́ВАННОСТЬ** *ж* цивилизациялылыҡ, мәҙәниәтлелек

**ЦИВИЛИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **цивилизова́ть 2.** *прил.* цивилизациялы, мәҙәниәтле

**ЦИВИЛИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* цивилизациялау, мәҙәниәтле итеү

**ЦИВИЛИЗОВА́ТЬСЯ** *сов., несов.* цивилизациялашыу, мәҙәниләшеү

**ЦИВИЛИ́СТИКА** *ж*; *юр.* цивилистика (*гражданлыҡ хоҡуҡтары тураһындағы фән*)

**ЦИГА́РКА** *ж*; *разг.* төрөлгән тәмәке, кәзә аяғы (*төрөлгән тәмәке*)

**ЦИГЕ́ЙКА** *ж* цигейка (*махсус эшкәртелгән һарыҡ тиреһе*); **воротни́к из цигe̕йки** цигейка яға

**ЦИГЕ́ЙКОВЫЙ,** -ая, -ое цигейка, цигейканан тегелгән; **циге́йковая ша́пка** цигейка бүрек

**ЦИКА́ДА** *ж* цикада (*ҡыр сиңерткәһе*)

**ЦИКЛ** *м*; *в разн. знач.* цикл; **биологи́ческий цикл** биологик цикл; **произво́дственный цикл** етештереү циклы; **цикл ле́кций по иску́сству** сәнғәт буйынса лекциялар циклы

**ЦИКЛАМЕ́Н** *м* цикламен, альп миләүшәһе

**ЦИКЛЕВА́ТЬ** *несов. что* ҡырып шымартыу; **циклева́ть парке́тные полы́** паркет иҙәнде ҡырып шымартыу

**ЦИКЛЁВКА** *ж см.* **циклева́ть**

**ЦИКЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** цикллы, цикллап (цикл менән) башҡарыла (ҡабатлана) торған; **цикли́ческое разви́тие** цикллы үҫеш **2.** (*составляющий цикл*) бер цикл тәшкил иткән, бер цикллы **3.** *хим.* циклик; **гру́ппа цикли́ческих элеме́нтов** циклик элементтар группаһы

**ЦИКЛИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** цикллыҡ, ҡабатланмалы булыу; **цикли́чность истори́ческих явле́ний** тарихи күренештәрҙең цикллылығы **2.** (*система организации производства*) цикллап эшләү; **цикли́чность произво́дственного проце́сса** етештереү процесының цикллап эшләүе

**ЦИКЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **цикли́ческий** 1

**ЦИКЛО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "цикллы", "циклик" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **циклотро́н** циклотрон (*атом киҫәксәләре хәрәкәтен тиҙләтеү аппараты*)

**ЦИКЛО́ИДА** *ж*; *мат.* циклоида (*кәкре һыҙыҡтың бер төрө*)

**ЦИКЛОИДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* циклоида ...ы, циклоидаль; **циклоида́льная ли́ния** циклоидаль һыҙыҡ

**ЦИКЛО́ИДНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **циклоида́льный**

**ЦИКЛО́Н** *м* **1.** *метеор.* циклон **2.** (*ураган*) дауыл, өйөрмә

**ЦИКЛОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *метеор.* циклоник; **циклони́ческие явле́ния** циклоник күренештәр; **циклони́ческие ви́хри** циклоник өйөрмәләр

**ЦИКЛО́П** *м* **1.** циклоп (*боронғо грек мифологияһында маңлайында һыңар күҙе булған бәһлеуән*) **2.** *зоол.* һыңар күҙ (*ваҡ ҡыҫала*)

**ЦИКО́РИЙ** *м* цикорий

**ЦИКУ́ТА** *ж* цикута (*ағыулы үҫемлек*)

**ЦИЛИ́НДР** *м* **1.** *мат.*, *тех.* цилиндр **2.** (*шляпа*) цилиндр эшләпә

**ЦИЛИНДРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *мат.* цилиндр ...ы, цилиндрик; **цилиндри́ческий ко́рпус** цилиндр корпусы; **цилиндри́ческая фо́рма** цилиндрик форма **2.** цилиндр һымаҡ, цилиндр тибындағы (формаһындағы); **цилиндри́ческая печь** цилиндр һымаҡ мейес; **цилиндри́ческий котёл** цилиндр формаһындағы ҡаҙан ♦ **цилиндри́ческая пове́рхность** *мат.* цилиндрик йөҙ

**ЦИЛИ́НДРОВЫЙ,** -ая, -ое *тех.* **1.** цилиндр ...ы; **цили́ндровый ход** цилиндр йөрөшө **2.** цилиндрлы; **цили́ндровая маши́на** цилиндрлы машина

**ЦИМБАЛИ́СТ** *м* цимбалсы (*цимбалда уйнаусы*)

**ЦИМБА́ЛЫ** *только мн.*; *муз.* цимбал (*ҡыллы музыка ҡоралы*)

**ЦИНГА́** *ж* зәңге (*теш ҡаҙнаһы ауырыуы*)

**ЦИНГО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** зәңге ...ы, зәңгеле, зәңге ауырыулы; **цинго́тные дёсны** зәңгеле теш ҡаҙнаһы **2.** (*страдающий цингой*) зәңге менән ауырыусы; **цинго́тный больно́й** зәңгеле ауырыу **3.** *в знач. сущ.* **цинго́тный** *м* и **цинго́тная** *ж* зәңге менән ауырыған кеше; **снабди́ть всех цинго́тных витами́нами** зәңге менән ауырыған кешеләрҙе витамин менән тәьмин итеү

**ЦИНИ́ЗМ** *м* оятһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек

**ЦИ́НИК** *м* оятһыҙ кеше, әҙәпһеҙ кеше

**ЦИНИ́ЧНОСТЬ** *ж* оятһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек

**ЦИНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое оятһыҙ, әҙәпһеҙ; **ци-ни́чный челове́к** оятһыҙ кеше

**ЦИНК** *м* цинк, тутыя (*химик элемент, металл*)

**ЦИНКОВА́ТЬ** *несов. что*; *тех.* цинклау

**ЦИ́НКОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** цинк ...ы, тутыя ...ы; **ци́нковое произво́дство** цинк производствоһы **2.** цинклы, тутыя ...ы, цинк ...ы; **ци́нковый купоро́с** цинклы купорос; **ци́нковая руда́** цинклы руда **3.** (*оцинкованный*) цинк, цинклы, цинк менән ҡапланған, цинк ялатылған; **ци́нковое ведро́** цинклы биҙрә

**ЦИНКОГРА́ФСКИЙ** и **ЦИНКОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *полигр.* цинкография ...ы, цинкографик; **цинкогра́фское клише́** цинкографик клише

**ЦИНКОГРА́ФИЯ** *м*; *полигр.* цинкография (**1.** *цинктан клишелар етештереү ысулы* **2.** *ошондай клишелар яһаусы предприятие йәки цех*)

**ЦИ́ННИЯ** *ж* цинния (*декоратив үҫемлек*)

**ЦИНО́ВКА** *ж* септә

**ЦИНО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое септә ...ы; **цино́вочная подсти́лка** септә түшәк

**ЦИРК** *м* цирк; **рабо́тать в ци́рке** циркта эшләү

**ЦИРКА́Ч** *м* и **ЦИРКА́ЧКА** *ж*; *разг.* цирк артисы

**ЦИРКОВО́Й,** -ая, -ое цирк ...ы; **цирково́й арти́ст** цирк артисы; **цирково́й нае́здник** цирк һыбайлыһы

**ЦИРКУЛИ́РОВАТЬ** *несов.* әйләнеп йөрөү (тороу); **вода́ циркули́рует по тру́бам** һыу торбалар буйлап әйләнеп йөрөй

**ЦИ́РКУЛЬ** *м* циркуль, йәзбә

**ЦИ́РКУЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** циркуль ...ы, йәзбә ...ы; **ци́ркульная но́жка** циркуль аяғы (сатаһы) **2.** (*имеющий форму круга, части круга*) түңәрәк, ярым түңәрәк; **ци́ркульный зал** түңәрәк зал; **ци́ркульная пила́** түңәрәк бысҡы

**ЦИРКУЛЯ́Р** *м* циркуляр, күрһәтмә

**ЦИРКУЛЯ́РНЫЙ I,** -ая, -ое циркуляр, күрһәтмә; **циркуля́рное письмо́** циркуляр хат

**ЦИРКУЛЯ́РНЫЙ II,** -ая, -ое түңәрәк; **циркуля́рный нож** түңәрәк бысаҡ

**ЦИРКУЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* әйләнмә, циркуляция ...ы, циркуляцион; **циркуляцио́нное движе́ние** әйләнмә хәрәкәт; **циркуляцио́нный насо́с** циркуляцион насос

**ЦИРРО́З** *м*; *мед.* цирроз; **цирро́з лёгких** үпкә циррозы

**ЦИСТЕ́РНА** *ж* цистерна; **железнодоро́жная цисте́рна** тимер юл цистернаһы

**ЦИСТИ́Т** *м*; *мед.* цистит (*һейҙек ҡыуығы ялҡынһыныуы*)

**ЦИТАДЕ́ЛЬ** *ж* **1.** цитадель (*ҡалға эсендәге нығытылған ҡоролма*) **2.** *чего*; *перен.* (*оплот*) терәк, таяныс; **цитаде́ль ми́ра** тыныслыҡ таянысы

**ЦИТА́ТА** *ж* цитата, өҙөмтә; **подкрепля́ть речь цита́тами** телмәрҙе өҙөмтәләр менән нығытыу

**ЦИТА́ТНЫЙ,** -ая, -ое цитата ...ы, өҙөмтә итеп алынған, өҙөмтәле; **цита́тный материа́л** цитата материалы; **цита́тный спо́соб иллюстра́ции** иллюстрацияның өҙөмтәле ысулы

**ЦИТВА́РНЫЙ: цитва́рное се́мя** дармана орлоғо, әрем орлоғо; **цитва́рная полы́нь** дармана үләне, дарыу әреме

**ЦИТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **цити́ровать**

**ЦИТИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* цитата (өҙөмтә) килтереү; **цити́ровать кла́ссиков** классиктарҙан өҙөмтә килтереү

**ЦИТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое цитологик, цитология ...ы; **цитологи́ческие иссле́дования** цитологик тикшеренеүҙәр

**ЦИТОЛО́ГИЯ** *ж* цитология (*биологияның күҙәнәк төҙөлөшө тураһындағы тармағы*)

**ЦИ́ТРА** *ж*; *муз.* цитра (*ҡыллы музыка ҡоралы*)

**ЦИ́ТРУС** *м* цитрус (*лимон, әфлисун кеүек үҫемлектәрҙең дөйөм исеме*)

**ЦИ́ТРУСОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** цитрус; **ци́трусовые плоды́** цитрус емештәр **2.** *в знач. сущ.* **ци́трусовые** *мн.*; *бот.* цитрустар, цитрус үҫемлектәр

**ЦИФЕРБЛА́Т** *м* циферблат; **цифербла́т часо́в** сәғәт циферблаты

**ЦИФЕРБЛА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** циферблат ...ы; **цифербла́тный квадра́тик** циферблат квадраты **2.** (*снабжённый циферблатом*) циферблатлы; **цифербла́тные весы́** циферблатлы үлсәү

**ЦИ́ФРА** *ж* **1.** (*знак, обозначающий число*) цифр, һан; **ара́бские ци́фры** ғәрәп цифрҙары **2.** *разг.* (*число, сумма*) һан; (*о денежной сумме*) хаҡ ♦ **контро́льные ци́фры** *см.* **контро́льный**; **астрономи́ческие ци́фры** *см.* **астрономи́ческий**

**ЦИФРОВА́ТЬ** *несов. что* (*нумеровать*) цифрлау, нумерлау, һан ҡуйып сығыу, һан менән билдәләү; **цифрова́ть страни́цы** биттәрҙе нумерлау

**ЦИФРОВО́Й,** -ая, -ое **1.** цифр ...ы; **цифровы́е вы́писки** цифр күсермәләре; **цифрова́я систе́ма** цифр системаһы **2.** цифрлы, һанлы; **цифровы́е да́нные** һанлы мәғлүмәттәр

**ЦИ́ЦЕРО** *м нескл.*; *полигр.* цицеро (*12 пунктлы типография шрифы*)

**ЦО́КАТЬ I** *несов.* **1.** таҡылдау, сыҡылдау, сыңҡылдау, сыҡ-сыҡ итеү; **цо́кают копы́та** тояҡтар сыҡылдай **2.** *чем* таҡылдатыу, сыҡылдатыу, сыңҡылдатыу, сыҡ-сыҡ иттереү; **цо́кать подко́вами** дағаларҙы сыңҡылдатыу **3.** (*о птицах и животных*) сутылдау, сут-сут итеү, сырҡ-сырҡ итеү

**ЦО́КАТЬ II** *несов.*; *лингв.* "ц"лаштырыу ("*ч*" *өнө урынына* "*ц*" *менән һөйләү*)

**ЦО́КНУТЬ** *сов. см.* **цо́кать** I

**ЦО́КОЛЬ** *м* цоколь (**1.** *архит. берәй короллманың түбәнге өлөшө* **2.** *тех. электр лампочкаһының патронға борола торған өлөшө*)

**ЦО́КОЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *архит.* цоколь ...ы, цоколле; **цо́кольная плита́** цоколь плитаһы ♦ **цо́кольный эта́ж** цоколь ҡаты

**ЦО́КОТ** *м* таҡылдау (сыҡылдау, сыңҡылдау, сыҡ-сыҡ иткән тауыш)

**ЦУГ** *м* сыбата, ос; (*о парах лошадей, волов и т.п.*) мисәү

**ЦУГОВО́Й,** -ая, -ое мисәүләп (сыбаталап, ослап) егелгән, мисәүле, сыбаталы; **цугова́я ло́шадь** мисәүләп егелгән ат

**ЦУ́ГОМ** *нареч.* сыбаталап, мисәүләп, ослап; **запряга́ть цу́гом** сыбаталап ат егеү; **е́хать цу́гом** ат ослап барыу

**ЦУКА́Т** *м* цукат (*шәкәрләнгән емеш йәки уның ҡабығы*)

**ЦУКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое цукатлы, цукат ...ы; **цука́тный торт** цукатлы торт

**ЦУНА́МИ** *с* и *ж нескл.* цунами (*океанда һыу аҫты ер тетрәүенән, вулкандар атылыуҙан хасил булған гигант тулҡын*); **цуна́ми разру́шило да́мбу** цунами дамбаны емерҙе

**ЦЫГА́НЕ** и *уст.* **ЦЫГА́НЫ** *мн.* сиғандар, сиған халҡы // *ед.* **цыга́н** *м* сиған ир-аты; **цыга́нка** *ж* сиған ҡатын-ҡыҙы

**ЦЫГА́НСКИЙ,** -ая, -ое сиған ...ы; **цыга́нский язы́к** сиған теле; **цыга́нский та́бор** сиғандар таборы

**ЦЫГА́НЩИНА** *ж*; *разг.* **1.** (*стиль исполнения романсов*) сиғандарға тартым башҡарыу, сиғандар кеүек башҡарыу **2.** (*романсы такого стиля*) сиған йырҙары

**ЦЫ́КАТЬ** *несов. на кого*; *прост.* "сеү" ("шым") тип тыйыу, асыуланып ҡысҡырыу, екереү, екренеү

**ЦЫ́КНУТЬ** *сов. см.* **цы́кать**

**ЦЫ́ПКИ** *мн.*; *разг.* сепей, себешке (*аяҡ-ҡулда ярылып ҡыҙарған урын*)

**ЦЫПЛЁНОК** *м* себеш, сепей ♦ **цыпля́т по о́сени счита́ют** себеште көҙ һанайҙар

**ЦЫПЛЯ́ЧИЙ,** -ья, ье себеш(тәр) ...ы, сепей(ҙәр) ...ы; **цыпля́чий корм** себеш аҙығы; **цыпля́чий пух** себеш мамығы

**ЦЫ́ПОЧКИ: на цы́почках**; **на цы́почки** аяҡ ослап; **ходи́ть на цы́почках** *перед кем* аяҡ ослап ҡына йөрөү (*ярамһаҡланыу*)

**ЦЫЦ** *межд.*; *прост.* сеү, шым

# Ч

**ЧАБА́Н** *м* чабан, һарыҡ көтөүсеһе

**ЧАБА́НИЙ,** -ья, -ье чабан ...ы, һарыҡ көтөүсеһе ...ы; **чаба́нья ю́рта** һарыҡ көтөүсеһе тирмәһе

**ЧАБА́НИТЬ** *несов.* һарыҡ көтөү, чабан булыу

**ЧАБА́НСКИЙ,** -ая, -ое һарыҡ көтөүсеһе ...ы, чабан ...ы; **чаба́нская рабо́та** һарыҡ көтөүсеһе эше

**ЧАБРЕ́Ц** *м* кейәү үләне, ҡанүлән

**ЧА́ВКАНЬЕ** *с см.* **ча́вкать**

**ЧА́ВКАТЬ** *несов.* **1.** (ауыҙ) шапылдатыу, (ауыҙ) сапылдатыу; **ча́вкать во вре́мя еды́** ашағанда ауыҙ шапылдатыу **2.** ласҡылдатыу, лас-лос итеү; **ло́шади ча́вкали копы́тами по гря́зи** аттар бысраҡты тояҡтары менән ласҡылдаттылар

**ЧА́ГА** *ж* ҡайын ороһо, ҡыу, ҡыуау

**ЧАД** *м* **1.** еҫ, һөрөм, төтөн **2.** *чего, какой*; *перен.* (*дурман*) һөрөм, ағыу

**ЧАДИ́ТЬ** *несов.* **1.** еҫ (һөрөм) сығарыу, төтәнләү, төтәү; **сыры́е дрова́ чадя́т** һыу утын төтәй **2.** *чем* төтәтеү; **чади́ть махо́ркой** махорка төтәтеү

**ЧА́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һөрөмлө, еҫле, төтөнлө, һөрөмләй (төтөнләй) торған **2.** *перен.* дыуамал, ҡыҙыу

**ЧА́ДО** *с*; *уст.*, *шутл.*, *ирон.* бала (*малай, ул, ҡыҙ*); **люби́мое ча́до** яратҡан бала

**ЧАДОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *уст.*, *шутл.* бала йәнле, балаһын яратҡан; **чадолюби́вый оте́ц** бала йәнле ата

**ЧАДРА́** *ж* бөркәнсек; **накры́ться чадро́й** бөркәнсек ябыныу

**ЧАЕ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "сәй" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **чаеразве́сочная фа́брика** сәй төрөү фабрикаһы

**ЧАЁВНИК** *м* и **ЧАЁВНИЦА** *ж*; *разг.* сәйхур (*сәй яратыусы*)

**ЧАЁВНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* сәйләп ултырыу, сәйләү, сәй эсеп ултырыу

**ЧАЕВО́Д** *м* сәй үҫтереүсе

**ЧАЕВО́ДСТВО** *с* сәй үҫтереү

**ЧАЕВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сәй үҫтереү ...ы; **чаево́дческое хозя́йство** сәй үҫтереү хужалығы

**ЧАЕВЫ́Е,** -ая, -ое *мн.* сәйлек (*аҡса*); **дава́ть чаевы́е** сәйлек биреү

**ЧАЕПИ́ТИЕ** *с* сәй эсеү, сәйләү; **организова́ть чаепи́тие** сәй эсеү ойоштороу

**ЧАЙНКА** *ж* сәй бөртөгө

**ЧАЙ I** *м* **1.** сәй; **куст ча́я** сәй ҡыуағы; **завари́ть чай** сәй бешереү; **разлива́ть чай** сәй яһау (ҡойоу); **кре́пкий чай** ҡаты сәй; **жи́дкий чай** шыйыҡ сәй **2.** (*чаепитие*) сәй эсеү; **во вре́мя ча́я** сәй эскәндә ♦ **зелёный чай** *см.* **зелёный**; **кирпи́чный чай** *см.* **кирпи́чный**; **чай да са́хар**; **чай с са́харом** *прост.* сәйегеҙ тәмле булһын; **гоня́ть чай** *прост.* оҙаҡ итеп сәй эсеү; **за ча́ем (ча́шкой ча́я)** сәй эскәндә; **на чай дава́ть** сәйлек биреү; **на чай (ча́шку ча́я) приглаша́ть (звать и т.п.)** сәйгә саҡырыу

**ЧАЙ II** *вводн. сл.*; *прост.* ахырыһы, күрәһең, моғайын, -дыр/-дер; **с доро́ги, чай, уста́ли** юлдан арып килгәнһегеҙҙер

**ЧА́ЙКА** *ж* аҡсарлаҡ; **морска́я ча́йка** диңгеҙ аҡсарлағы

**ЧА́ЙНАЯ** *ж* сәйхана

**ЧА́ЙНИК** *м* сәйгүн, сәйнүк

**ЧА́ЙНИЦА** *ж* сәй һауыты

**ЧА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое сәй ...ы; **ча́йный куст** сәй ҡыуағы; **ча́йный лист** сәй япрағы; **ча́йные планта́ции** сәй плантациялары; **ча́йный подно́с** сәй батмусы; **ча́йная ло́жка** сәй ҡалағы, балғалаҡ ♦ **ча́йный гриб** сәй бәшмәге; **ча́йный квас** сәй кеүәҫе; **ча́йная ро́за** һары роза, сәй розаһы; **че́рез час по ча́йной ло́жке** бик әкрен, ныҡ яй, саҡ-саҡ

**ЧАЙХАНА́** *ж* сәйхана

**ЧАЛ** *м* арҡан, сылбыр (*пароход, паром һ.б. бәйләп ҡуйыу өсөн*)

**ЧА́ЛИТЬ** *несов. что* бәйләп (тарттырып) ҡуйыу (*арҡан, сылбыр менән*)

**ЧАЛМА́** *ж* сәллә, салма; **повяза́ть чалму́** сәлләә урау

**ЧА́ЛЫЙ,** -ая, -ое (*о масти лошади*) бурыл

**ЧАН** *м* киҫмәк, шаң (*ағас мискә*); **чан с водо́й** һыулы киҫмәк

**ЧА́РА** *ж*; *высок., трад.-поэт.* чара (*шарап эсә торған һауыт*)

**ЧА́РДАШ** и **ЧАРДА́Ш** *м* чардаш (*венгр халыҡ бейеүе һәм уның музыкаһы*)

**ЧА́РКА** *ж*; *уменьш. от* **ча́ра**

**ЧАРЛЬСТО́Н** и **ЧА́РЛЬСТОН** *м* чарльстон (*Америка бал бейеүе һәм уның музыкаһы*)

**ЧАРОВА́ТЬ** *несов.* **1.** (*колдовать*) сихырлау **2.** *кого-что* (*обвораживать*) һоҡландырыу, күңелде биләү, сихырлау, әсир итеү; **чарова́ть свои́м го́лосом** тауышы менән әсир итеү

**ЧАРОДЕ́Й** *м* и **ЧАРОДЕ́ЙКА** *ж* **1.** (*колдун и колдунья*) сихырсы, тылсымсы **2.** (*пленяющий чем-л. человек*) күңелде арбаусы (биләүсе), әсир итеүсе, тылсымсы

**ЧАРОДЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*колдовской*) сихри, тылсымлы; **чароде́йная си́ла** сихри көс **2.** сихри, тылсымлы, әсир итеүсе, күңелде биләүсе

**ЧАРОДЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **чароде́йный**

**ЧАРОДЕ́ЙСТВО** *с*; *уст.* (*колдовство*) сихыр, сихырсылыҡ

**ЧАРУ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **чарова́ть** **2.** *прил.* һоҡландырғыс, һоҡландырырлыҡ, ғәжәп матур, һөйкөмлө, яғымлы

**ЧА́РЫ** *мн.* **1.** *уст.* сихыр, сихырсылыҡ, тылсым **2.** (*очарование, обаяние*) һоҡланғыс булыу, һөйкөмлөлөк, яғымлылыҡ

**ЧАС** *м* **1.** *в разн. знач.* сәғәт; **полтора́ часа́** сәғәт ярым; **опозда́ть на час** бер сәғәткә һуңлау; **двена́дцать часо́в но́чи** төнгө сәғәт ун ике; **два часа́ дня** көндөҙгө сәғәт ике; **кото́рый час?** сәғәт нисә?; **академи́ческий час** академик сәғәт **2.** (*время, пора*) сәғәт, ваҡыт, мәл; **вече́рний час** киске ваҡыт; **обе́денный час** төшкө аш ваҡыты; **час о́тдыха** ял ваҡыты; **всему́ свой час** һәр нәмәнең үҙ мәле **3.** *мн.* **часы́**; *воен.* ҡарауыл (*поста тороу*); **стоя́ть на часа́х** ҡарауылда тороу ♦ **адмира́льский час** төшкө аш ваҡыты, өйлә; **би́тый час** *см.* **би́тый**; **коменда́нтский час** *см.* **коменда́нтский**; **после́дний (сме́ртный) час** үлем сәғәте; **ти́хий (мёртвый) час** ял сәғәте; **часы́ пик** пик сәғәте; **час в час** теп-теүәл, ҡуйылған ваҡытҡа; **час о́т часу** сәғәт һайын, яйлап; **в до́брый час!** хәйерле сәғәттә!; **в свой час** үҙ ваҡытында; **до э́того ча́са** ошоға тиклем, ошо ваҡытҡа тиклем; **не по дням, а по часа́м** *см.* **день**; **не ро́вен (не ровён) час** *см.* **ро́вный**; **по часа́м** билдәле ваҡытта; **сей же час** хәҙер үк; **в тот же час** шунда уҡ

**ЧАСА́МИ** *нареч.* оҙаҡ ваҡыт, сәғәттәр буйына; **часа́ми сиде́ть мо́лча** сәғәттәр буйына өндәшмәй ултырыу

**ЧАСО́ВНЯ** *ж* часовня (*бәләкәй сиркәү*)

**ЧАСОВО́Й I,** -ая, -ое **1.** (бер) сәғәтлек, сәғәтләп; **часова́я бесе́да** бер сәғәтлек әңгәмә; **часова́я но́рма** бер сәғәтлек норма; **часова́я опла́та** сәғәтләп түләү **2.** *разг.* сәғәт берҙәге; **уе́хать часовы́м по́ездом** сәғәт берҙәге поезд менән китеү ♦ **часово́й по́яс** *спец.* сәғәт бүлкәте (*Ер шарының 1/24 өлөшө*)

**ЧАСОВО́Й II,** -ая, -ое сәғәт ...ы; **часово́й заво́д** сәғәт заводы; **часова́я стре́лка** сәғәт теле ♦ **часово́й ма́стер**; **часовы́х дел ма́стер** *см.* **часовщи́к** 1

**ЧАСОВО́Й III** *м* часовой, һаҡсы; **сме́на часовы́х** часовойҙар алмашыныуы; **поста́вить часово́го** һаҡсы ҡуйыу

**ЧИСЛИ́ТЕЛЬНЫЙ: и́мя числи́тельное** *грам.* һан (*һүҙ төркөмө*); **числи́тельное** *с*; *грам.* һан; **коли́чественные числи́тельные** төп һандар; **поря́дковые числи́тельные** рәт һандары

**ЧИ́СЛИТЬ** *несов. кого-что* **1.** *уст.* (*исчислять*) иҫәбен алыу, һанау **2.** (*признавать каким-л.*) тип һанау (иҫәпләү); **чи́слить больны́м** ауырыу тип иҫәпләү; **чи́слить в отпуску́** ялда тип һанау

**ЧИ́СЛИТЬСЯ** *несов.* **1.** һаналыу, хисапланыу, иҫәпләнеү, иҫәптә тороу; **чи́слиться в спи́ске** исемлектә һаналыу; **чи́слиться в командиро́вке** командировкала тип иҫәпләнеү **2.** *страд. от* **чи́слить**

**ЧИСЛО́** *с* **1.** һан; **дро́бное число́** кәсер һан; **це́лое число́** бөтөн һан **2.** көн, число; **пе́рвые чи́сла сентября́** сентябрҙең беренсе көндәре; **како́е сего́дня число́?** бөгөн ниндәй (нисәнсе) число? **3.** (*количество*) һан, иҫәп; **число́ заво́дов растёт** заводтар һаны арта **4.** (*состав, ряд*) иҫәп, ара; **в числе́ прису́тствующих** ҡатнашыусылар араһында **5.** *лингв.* һан; **мно́жественное число́** күплек һаны ♦ **в том числе́** шул иҫәптән; **нет числа́** *кому-чему*; **без числа́** иҫәп-хисапһыҙ, һанһыҙ, бик күп; **за́дним число́м** *см.* **за́дний**; **по пе́рвое число́** ҡаты шелтәләү

**ЧИСЛОВО́Й,** -ая, -ое **1.** һан ...ы; **числова́я величина́** һан дәүмәле **2.** һан ...ы, һан яғынан, һан менән бирелгән; **числово́й масшта́б карт** картаның һан масштабы; **числовы́е да́нные** һан менән бирелгән мәғлүмәттәр, һан мәғлүмәте

**ЧИСТИ́ЛИЩЕ** *с* араф (*ожмахҡа инер алдынан гөнаһтарҙан таҙарыныу урыны*)

**ЧИ́СТИЛЬЩИК** *м* и **ЧИ́СТИЛЬЩИЦА** *ж* таҙартыусы; **чи́стильщик сапо́г** итек таҙартыусы

**ЧИ́СТИТЬ** *несов. кого-что* **1.** таҙартыу; **чи́стить ковёр пылесо́сом** саң һурғыс менән келәм таҙартыу; **чи́стить щёткой пла́тье** күлдәкте щётка менән таҙартыу; **чи́стить доро́гу** юл таҙартыу **2.** таҙартыу; (*срезать кожуру*) әрсеү; (*скоблить*) ҡырыу, ҡырсыу; **чи́стить карто́шку** картуф әрсеү; **чи́стить я́годы** еләк таҙартыу; **чи́стить ры́бу** балыҡ ҡырсыу **3.** *прям., перен., разг.* таҙартыу, арындырыу, айырыу; **чи́стить во́ду от со́ли** һыуҙы тоҙҙан айырыу; **чи́стить ка́дры** кадрҙарҙы таҙартыу **4.** *перен., прост.* (*грабить*) таҙартыу, урлау; **чи́стить карма́н** кеҫәне таҙартыу

**ЧИ́СТИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*чистить себя*) таҙарыныу **2.** *страд. от* **чи́стить**

**ЧИ́СТКА** *ж см.* **чи́стить** 1, 2

**ЧИ́СТО 1.** *нареч.* таҙа, таҙа итеп; **чи́сто убра́ть ко́мнату** бүлмәне таҙа итеп йыйыштырыу **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* таҙа; **в ко́мнате чи́сто** бүлмәлә таҙа **3.** *нареч.*; *разг.* (*совсем*) бөтөнләй, тулыһынса, тамам, ысын; **чи́сто изму́читься** бөтөнләй яфаланыу **4.** *в знач. сравн. союза*; *прост.* нәҡ, кеүек, әйтерһең, шикелле, тиерһең; **поёт — чи́сто солове́й** һандуғас кеүек йырлай ♦ **чи́сто-на́чисто (вы́мыть, вы́чистить и т.п.)** тап-таҙа итеп (йыуыу һ.б)

**ЧИСТОВИ́К** *м*; *разг.* аҡлама, аҡ; **переписа́ть на чистови́к** аҡҡа күсереп яҙыу

**ЧИСТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** аҡлама ...ы; **чистова́я тетра́дь** аҡлама дәфтәр **2.** аҡҡа күсерелгән, аҡҡа күсереп яҙыу ...ы; **чистово́й экземпля́р ру́кописи** ҡульяҙманың аҡҡа күсерелгән нөсхәһе;

**ЧИСТОГА́Н** *м*; *прост.* ҡул аҡса; **заплати́ть чистога́ном** ҡул аҡса менән түләү

**ЧИСТОКРО́ВНОСТЬ** *ж* саф тоҡомлолоҡ (нәҫеллелек), яҡшы тоҡомлолоҡ; **чистокро́вность жеребца́** айғырҙың саф тоҡомлолоғо

**ЧИСТОКРО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о животных*) саф (яҡшы) тоҡомло (нәҫелле); **чистокро́вная ло́шадь** яҡшы тоҡомло ат **2.** *разг.* (*о людях*) ысын, саф, аҫыл; **чистокро́вный аристокра́т** ысын аҡһөйәк

**ЧИСТОПИСА́НИЕ** *с* таҙа яҙыу, матур яҙыу; **уро́к чистописа́ния** матур яҙыу дәресе

**ЧИСТОПЛО́ТНОСТЬ** *ж* **1.** таҙалыҡ һөйөү (яратыу), бөхтәлек яратыу, үҙен таҙа йөрөтөү; **привы́чка к чистопло́тности** үҙен таҙа йөрөтөү ғәҙәте **2.** *перен.* (*порядочность, честность*) намыҫлылыҡ, сафлыҡ, әхлаҡлылыҡ

**ЧИСТОПЛО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** таҙалыҡ (бөхтәлек) яратҡан, үҙен таҙа йөрөткән, бөхтә; **чистопло́тный челове́к** таҙалыҡ яратҡан кеше **2.** *перен.* (*честный, порядочный*) намыҫлы, саф, әхлаҡлы

**ЧИСТОПОРО́ДНОСТЬ** *ж* саф тоҡомлолоҡ (нәҫеллелек)

**ЧИСТОПОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое саф тоҡомло (нәҫелле); **чистопоро́дный скот** саф тоҡомло мал

**ЧИСТОПРО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иң юғары пробалы, юғары сифатлы, саф, таҙа (*алтын, көмөш*); **чистопро́бное зо́лото** саф алтын **2.** *перен.*, *обычно ирон.* насар ғәҙәтле, ысын; **чистопро́бный негодя́й** ысын ҡәбәхәт

**ЧИСТОСЕРДЕ́ЧНОСТЬ** *ж* ысын (саф) күңеллелек, эскерһеҙлек, ихласлыҡ

**ЧИСТОСЕРДЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое саф күңелле, ысын күңелдән, эскерһеҙ, ихлас; **чистосерде́чное раска́яние** ысын күңелдән тәүбә итеү (ҡылыу); **чистосерде́чный челове́к** эскерһеҙ кеше

**ЧИСТОСО́РТНЫЙ,** -ая, -ое таҙа сортлы, һайланма, һайлап алынған; **чистосо́ртное зерно́** таҙа сортлы иген

**ЧИСТОТА́** *ж* **1.** таҙа(лыҡ), бөхтәлек, паклыҡ; **соблюда́ть чистоту́** таҙалыҡ һаҡлау; **содержа́ть в чистоте́** таҙа тотоу **2.** (*тщательность, аккуратность*) ентеклелек, аныҡлылыҡ, бөхтәлек, ыҡсымлыҡ; **чистота́ обрабо́тки дета́ли** деталь эшкәртеүҙәге ентеклелек **3.** асыҡлыҡ, таҙалыҡ; (*безоблачность*) аяҙлыҡ; **чистота́ реки́** йылғаның таҙалығы **4.** (*отсутствие примеси*) сафлыҡ, таҙалыҡ; **чистота́ во́здуха** һауаның таҙалығы; **чистота́ ржи** арыштың сафлығы **5.** асыҡлыҡ, аныҡлыҡ, дөрөҫлөк; **чистота́ го́лоса** тауыштың асыҡлығы **6.** *перен.* сафлыҡ, таҙалыҡ; **чистота́ души́** күңел сафлығы

**ЧИСТОТЕ́Л** *м* сөйәл үләне

**ЧИСТОШЕРСТЯНО́Й,** -ая, -ое йөн, йөндән; **чистошерстяно́й трикота́ж** йөн трикотаж

**ЧИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** таҙа; **чи́стая ко́мната** таҙа бүлмә; **чи́стая посу́да** таҙа һауыт-һаба; **чи́стое полоте́нце** таҙа таҫтамал **2.** (*сделанный аккуратно, тщательно*) ентекле (эшләнгән), аныҡ; **чи́стая отде́лка** ентекле эшләнгән биҙәк **3.** (*ничем не заполненный*) таҙа, буш; (*безоблачный — о небе*) аяҙ; **чи́стое по́ле** буш ялан; **чи́стое не́бо** аяҙ күк; **чи́стый лист бума́ги** таҙа ҡағыҙ бите **4.** саф, таҙа, ҡушымтаһыҙ; **чи́стое зо́лото** саф алтын; **чи́стый спирт** таҙа спирт; **чи́стый во́здух** саф һауа; **чи́стая поро́да** саф тоҡом **5.** асыҡ, аныҡ, дөрөҫ; **чи́стый го́лос** асыҡ тауыш; **чи́стое произноше́ние** асыҡ әйтелеш **6.** *перен.* ғәйепһеҙ, саф, намыҫлы; **чи́стые лю́ди** намыҫлы кешеләр; **чи́стая любо́вь** саф мөхәббәт; **чи́стые побужде́ния** саф ниәттәр **7.** (*получающийся после вычета чего-л.*) саф; **чи́стая при́быль** саф табыш; **чи́стый вес** саф ауырлыҡ **8.** *разг.* ысын, тулыһынса, бөтөнләй; **чи́стый вздор** тулыһынса сафсата; **чи́стая случа́йность** ысын осраҡлылыҡ ♦ **чи́стое иску́сство** саф сәнғәт (*эстетик йүнәлеш*); **чи́стый пар** ҡара (таҙа) пар; **чи́стой (чисте́йшей) воды́** *кто-что* бөтә торошо менән, асыҡтан-асыҡ күренеп торған, ысын; **от чи́стого се́рдца** ихлас (ысын) күңелдән, бөтә йөрәктән; **вы́вести на чи́стую во́ду** *см.* **вода́**; **приня́ть за чи́стую моне́ту** ысынға алыу

**ЧИСТЮ́ЛЯ** *м* и *ж*; *разг.* бик таҙа, бөхтә (*саманан тыш таҙалыҡ яратыусы*)

**ЧИТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое уҡыу ...ы; **чита́льный зал** уҡыу залы

**ЧИТА́ЛЬНЯ** *ж* уҡыу бүлмәһе (*китапханала*); **занима́ться в чита́льне** уҡыу бүлмәһендә шөғөлләнеү

**ЧИТА́ТЕЛЬ** *м* и **ЧИТА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* (китап) уҡыусы; **встре́ча писа́теля с чита́телями** яҙыусының китап уҡыусылар менән осрашыуы

**ЧИТА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое (китап) уҡыусы(лар) ...ы; **чита́тельская конфере́нция** китап уҡыусылар конференцияһы

**ЧИТА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* уҡыу; **чита́ть газе́ту** гәзит уҡыу; **уме́ть чита́ть** уҡый белеү **2.** *что* (*понимать*) уҡыу, аңлау; **чита́ть но́ты** ноталар уҡыу; **чита́ть чертежи́** һыҙымдар уҡыу **3.** *что*; *перен.*

күреү, тойоу, һиҙеү, күреп (һиҙеп) тороу; **чита́ть по глаза́м** күҙҙәренән күреп тороу **4.** *что* (*произносить наизусть*) уҡыу, һөйләү, яттан һөйләү; **чита́ть моли́тву** доға уҡыу; **чита́ть стихи́** яттан шиғыр һөйләү **5.** *что* и *без доп.* уҡытыу, уҡыу; **чита́ть курс в университе́те** университетта курс уҡытыу ♦ **чита́ть наставле́ния (нравоуче́ния, нота́ции)** аҡыл өйрәтеү, өгөт-нәсихәт биреү; **чита́ть в се́рдце (в душе́)** берәүҙең күңелендәге уйын белеү; **чита́ть ме́жду строк** юл араһынан уҡыу (*йәшерен әйтелгәнде, әйтеп бөтөрмәгән уйҙарҙы тотоп алыу*)

**ЧИТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** уҡылыу; **э́та кни́га легко́ чита́ется** был китап еңел уҡыла **2.** *кому безл.* (*обычно с отрицанием*) уҡығы килеү; **ему́ что́-то не чита́ется** уның ни өсөндөр уҡығыһы килмәй **3.** *перен.* һиҙелеү, һиҙелеп (тойолоп, күренеп) тороу, тойолоу, күренеү; **в его́ глаза́х чита́ется апа́тия** уның күҙҙәрендә төшөнкөлөккә бирелгәнлек һиҙелеп тора **4.** *страд. от* **чита́ть**

**ЧИ́ТКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **чита́ть** 1, 4; **чи́тка корректу́ры** корректура уҡыу **2.** (*вид репетиции*) уҡыу, ролдәргә бүлеп уҡыу

**ЧИХА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сөскөрткөс, сөскөртә торған; **чиха́тельный газ** сөскөрткөс газ

**ЧИХА́ТЬ** *несов.* сөскөрөү

**ЧИХНУ́ТЬ** *сов.* сөскөрөп ебәреү

**ЧЛЕН** *м* **1.** (*часть тела человека — чаще о конечностях*) ағза **2.** (*часть целого*) киҫәк, быуын; **член пропо́рции** пропорция быуыны; **член уравне́ния** тигеҙләмә быуыны; **член предложе́ния** һөйләм киҫәге **3.** ағза, член; **член прави́тельства** хөкүмәт ағзаһы; **действи́тельный член Акаде́мии наук РБ** БР фәндәр академияһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы; **член семьи́** ғаилә ағзаһы

**ЧЛЕНЕ́НИЕ** *с см.* **члени́ть**

**ЧЛЕ́НИК** *м*; *зоол.* быуынтыҡ

**ЧЛЕНИСТОНО́ГИЕ** *мн.*; *зоол.* быуынтыҡ аяҡлылар (*ҡыҫала, ҡрмәксе кеҫектәр ҡарай*)

**ЧЛЕНИ́ТЬ** *несов. что* бүлгеләү, бүлеү, ваҡлау, айырғылау

**ЧЛЕНИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бүлгеләнеү, ваҡланыу, бүленеү, киҫәктәргә айырылыу **2.** *страд. от* **члени́ть**

**ЧЛЕН-КОРРЕСПОНДЕ́НТ** *м* ағза-корреспондент; **член-корреспондент Акаде́мии нау́к РБ** БР фәндәр академияһының ағза-корреспонденты

**ЧЛЕНОВРЕДИ́ТЕЛЬСТВО** *с* тән ағзаһын ғәриплəү, зәғифләү, боҙоу (*гәҙәттә уҙ-уҙен*)

**ЧЛЕНОРАЗДЕ́ЛЬНОСТЬ** *ж* аныҡ (асыҡ) әйтелеү (һөйләнеү һ.б.); **членоразде́льность ре́чи** телмәрҙең асыҡ әйтелеүе

**ЧЛЕНОРАЗДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аныҡ, асыҡ, аңлайышлы; **членоразде́льный отве́т** аныҡ яуап

**ЧЛЕ́НСКИЙ,** -ая, -ое ағзалыҡ ...ы, членлыҡ ...ы; **чле́нский биле́т** ағзалыҡ билеты

**ЧЛЕ́НСТВО** *с* ағза булыу; **доброво́льное чле́нство** ирекле рәүештә ағза булыу

**ЧМО́КАТЬ** *несов.* **1.** (*губами*) сапылдатыу, супылдатыу **2.** *кого-что*; *разг.* (*звучно целовать*) супылдатып үбеү, суп итеп үбеп алыу **3.** лаҫҡылдау, шапылдау; **под нога́ми чмо́кает вода́** аяҡ аҫтында һыу лаҫҡылдап ята; **грязь чмо́кает под колёсами** тәгәрмәстәр аҫтында батҡаҡ лаҫҡылдай

**ЧМО́КНУТЬ** *сов.* **1.** (*губами*) сапылдатып (супылдатып) алыу **2.** *кого* үбеп алыу, суп иттереп үбеү **3.** лаҫҡылдап (шапылдап) ҡуйыу

**ЧО́КАТЬСЯ** *несов.* сәкәшеү, сәкәштереү

**ЧО́ПОРНОСТЬ** *ж* һауалылыҡ, ҡылансыҡлыҡ, тәкәллефлелек

**ЧО́ПОРНЫЙ,** -ая, -ое һауалы, ҡылансыҡ, тәкәллефле; **чо́порный челове́к** һауалы кеше

**ЧО́ХОМ** *нареч.*; *прост.* тулыһынса, тотошлай, күмәртәләп, тулайым; **брать всё чо́хом** бөтәһен тулайым алыу

**ЧРЕВА́ТЫЙ,** -ая, -ое тыуҙыра торған, тыуҙырырлыҡ, тулы, килтереп сығарырлыҡ, барлыҡҡа килтерерлек; **чрева́тое тяжёлыми после́дствиями собы́тие** ауыр эҙемтәләр менән тулы ваҡиға

**ЧРЕ́ВО** *с* **1.** *уст.* ҡорһаҡ, ҡарын; **во чре́ве ма́тери** әсә ҡарынында **2.** *перен.*, *книжн.* эс, эске өлөш; **чре́во корабля́** карабтың эсе

**ЧРЕВОВЕЩА́НИЕ** *с* эстән һөйләү (*ирендәрҙе ҡыбырлатмай һөйләшә алыу*)

**ЧРЕВОВЕЩА́ТЕЛЬ** *м* и **ЧРЕВОВЕЩА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* эстән һөйләүсе (*ирендәрҙе ҡыбырлатмай һөйләшә алыусы кеше*)

**ЧРЕВОУГО́ДИЕ** *с*; *уст.* ашамһаҡлыҡ, бирәнлек

**ЧРЕВОУГО́ДНИК** *м* и **ЧРЕВОУГО́ДНИЦА** *ж*; *уст.* ашамһаҡ, бирән

**ЧРЕВОУГО́ДНИЧАТЬ** *несов.*; *уст.* ашамһаҡланыу, бирәнләнеү

**ЧРЕЗВЫЧА́ЙНО** *нареч.* бик, үтә ныҡ, бигерәк, ғәҙәттән (сиктән) тыш, ифрат; **всё э́то чрезвыча́йно интере́сно** былар бөтәһе лә бик ҡыҙыҡ

**ЧРЕЗВЫЧА́ЙНОСТЬ** *ж* ғәҙәттән (сиктән) тыш булыу ♦ **до чрезвыча́йности** сиктән тыш, бигерәк тә

**ЧРЕЗВЫЧА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*исключительный*) ғәҙәттән тыш, сиктән тыш; **чрезвыча́йная ва́жность све́дений** мәғлүмәттәрҙең ғәҙәттән тыш мөһимлеге; **чрезвыча́йный успе́х** сиктән тыш уңыш **2.** (*экстренный*) ғәҙәттән тыш, ашығыс; **чрезвыча́йный съезд** ғәҙәттән тыш съезд; **чрезвыча́йные ме́ры** ашығыс саралар

**ЧРЕЗМЕ́РНО** *нареч.* кәрәгенән тыш, саманан тыш, артыҡ, үтә; **чрезме́рно дли́нная шу́ба** артыҡ оҙон тун

**ЧРЕЗМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое кәрәгенән тыш, саманан тыш, артыҡ, үтә (бик) ҙур; **чрезме́рное внима́ние** үтә ҙур иғтибар; **чрезме́рные тре́бования** саманан тыш талаптар

**ЧТЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **чита́ть**; **бе́глое чте́ние** күҙ йүгертеп уҡыу **2.** (*читаемый текст*) уҡылған (уҡыла торған) текст (китап, әҫәр); **э́то инте-**

**ре́сное чте́ние** был ҡыҙыҡлы уҡыла торған китап **3.** *мн.* **чте́ния** уҡыуҙар; **педагоги́ческие чте́ния** педагогик уҡыуҙар; **Пу́шкинские чте́ния** Пушкин уҡыуҙары

**ЧТЕЦ** *м* **1.** ҡысҡырып уҡыусы **2.** (*артист*) тасуири уҡый белеүсе

**ЧТИТЬ** *несов. кого-что* хөрмәтләү, ололау, ҙурлау, хөрмәтләп иҫкә алыу; **чтить па́мять** хөрмәтләп иҫкә алыу

**ЧТО I** *мест.* **1.** ни, нимә; **что с ва́ми?** һеҙгә ни булды?; **что случи́лось?** нимә булды?; **чем вы недово́льны?** һеҙ нимә менән риза түгелһегеҙ?; **что ж э́то?** был нимә? **2.** *в знач. сказ.* (*в каком состоянии, положении кто-что-л. находится*) ниндәй, ни хәлдә, нисек; **что больно́й?** ауырыу ни хәлдә?; **а что Амина́?** ә Әминә нисек? **3.** *в знач. нареч.* (*почему, зачем, по какой причине*) ниңә, нимәгә, ни өсөн, нилектән, нишләп, ни сәбәпле; **что ты так кричи́шь?** нимәгә һин шулай ҡысҡыраһың?; **что ты заду́мался?** һин ниңә уйға сумдың?; **что же ты не е́дешь?** һин нишләп бармайһың? **4.** *разг.* (*сколько*) ни хаҡ, күпме; **что сто́ит кни́га?** китап күпме тора **5.** (*ничто, ничего не значит*) ни; **что то́лку в э́том?** бынан ни мәғәнә?; **что по́льзы?** ни файҙа? **6.** *разг.* (*что-нибудь, что-то*) нимә лә булһа, берәй, нимәлер, ниндәйҙер; **скажи́те, нет ли чего́ но́венького** әйтегеҙ әле, берәй яңылыҡ юҡмы **7.** (*всё без исключения, очень многое*) нимә генә, нимәләр генә, бөтәһе; **чего́ то́лько не везли́!** нимәләр генә алып барманылар!; **торгова́ть чем уго́дно** бөтәһе менән һатыу итеү **8.** (*с частицей* “*вот*”) бына нимә; **вот что я тебе́ скажу́** мин һиңә бына нимә әйтәм **9.** (*который*) ҡайһылыр, -ған/-гән, -ыусы/-еүсе; **дом, что стои́т у реки́** йылға буйында торған өй **10.** нимә; **они́ зна́ли, на что иду́т** улар нимәгә барғандарын беләләр ине ♦ **а что?** ә нимә?; **до чего́...**: 1) бик, үтә, сиктән тыш, ғәҙәттән тыш; 2) ниндәй дәрәжәгә, ниндәй хәлгә; **к чему́?** нишләп?, ниндәй маҡсат өсөн?, нимәгә?; **не́ к чему** *в знач. сказ.* файҙаһыҙ, кәрәге юҡ; **ни за что** бер нисек тә; **ни за что**; **ни за что ни про что** буштан-бушҡа, тиктомалға, һис тә юҡҡа; **вон (оно́) что** *см.* **вот**; **хоть бы что** *кому*: 1) булды ни ҙә булманы ни; 2) бер ни түгел, бер ни юҡ; **что вы! (ты!)** һеҙ (һин) нимә!; **что и говори́ть** *см.* **говори́ть**; **что ни (на) есть** нимә бар; **во что бы то ни ста́ло** һүҙһеҙ, нимә генә (нисек кенә) булһа ла, һис шикһеҙ; **ни во что не ста́вить (счита́ть)**; **ни при чём (быть)**; **ни с чем уйти́ (оста́ться, верну́ться)**; **ни к чему́** *см.* **ничто́**; **что есть ду́ху** *см.* **дух**

**ЧТО II** *союз* **1.** *изъясн.* тип -ған/-гән, -ғанға/-гәнгә, -ғандай/-гәндәй; **жаль, что ты не пришёл** үкенесле, килмәгәнһең; **почу́вствовал, что засыпа́ю** йоҡлап барғандай тойолдом

**2.** (*в сочетании со словами* “*так*”, “*настолько*” *и т.п.*) хатта; **тако́й тяжёлый, что не подня́ть** шундай ауыр, хатта күтәреп булмай

**3.** (*с частицей* “*ни*” *и без неё*) да/дә, һайын; **что ни день, появля́ются но́вые пробле́мы** көн һайын яңы проблемалар сығып тора

**4.** *разд.* -мы/-ме, әллә -мы/-ме; ни, ... ни; ла, ... ла; **что в го́роде, что в дере́вне** ҡалала ла, ауылда ла шул; **мне всё равно́, что здесь жить, что там** бында йәшәнең ни, тегендә ни, минең өсөн барыбер ♦ **что в лоб, что по́ лбу** *погов.* барыбер, ни булһа ла

**ЧТОБ** и **ЧТО́БЫ** *союз* и *частица* **1.** *союз* өсөн, тип; **тороплю́сь, чтоб успе́ть на по́езд** поезға өлгөрөр өсөн ашығам; **он вы́шел че́рез за́дние воро́та, что́бы не заме́тили дома́шние** өйҙәгеләр күрмәһен тип, ул артҡы ҡапҡанан сыҡты **2.** *союз изъяснит.* -һын/-һен; **смотри́, что́бы всё бы́ло в поря́дке** ҡара уны, бөтөнөһө лә тәртиптә булһын **3.** *частица* -һын/-һен; **чтоб бо́льше так не́ было** бынан ары улай булмаһын

**ЧТО́-ЛИБО** и **ЧТО́-НИБУДЬ** *мест.* берәй нәмә, нимә булһа ла, ни ҙә булһа; **взять что́-нибудь почита́ть** уҡырға берәй нәмә алыу

**ЧТО́-ТО I** *мест.* нимәлер, нимәгәлер, нишләптер, нимә булһа ла, әллә нимә; **что́-то непоня́тно** нишләптер аңлашылмай

**ЧТО́-ТО II** *нареч.*; *разг.* **1.** (*в некоторой степени*) бер ни тиклем, бер аҙ; **мне что́-то нездоро́вится** мин бер аҙ ауырыбыраҡ торам **2.** (*почему-то*) нисектер, ниңәлер, нишләптер; **что́-то у меня́ голова́ кру́жится** минең ниңәлер башым әйләнә

**ЧУ** *межд.* сеү; **чу! То́пот како́й-то** сеү! Ниндәйҙер аяҡ тауышы

**ЧУБ** *м* өлтөк (*маңлай сәсе*)

**ЧУБА́РЫЙ,** -ая, -ое (*о масти лошади*) сыбар, алмасыбар

**ЧУБА́ТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* өлтөклө

**ЧУБУ́К** *м* **1.** төрөпкә һабы **2.** *сад.* (*виноградный черенок*) йөҙөм сыбыҡсаһы (*ултыртыу өсөн*)

**ЧУВАШИ́** и **ЧУВА́ШИ** *мн.* сыуаштар, сыуаш халҡы // *ед.* **чува́ш** и *уст.* **чува́шин** *м* сыуаш ир-аты; **чува́шка** *ж* сыуаш ҡатын-ҡыҙы

**ЧУВА́ШСКИЙ,** -ая, -ое сыуаш ...ы; **чува́шский язы́к** сыуаш теле

**ЧУ́ВСТВЕННОСТЬ** *ж* **1.** һиҙеүсәнлек, тойоусанлыҡ **2.** (*склонность к чувственным влечениям*) хислелек, тойғолоҡ, хискә (тойғоға) бирелеүсәнлек; **чу́вственность взгля́да** ҡараштың хислелеге

**ЧУ́ВСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** һиҙеү ...ы, тойоу ...ы, һиҙеү (тойоу) аша; **чу́вственное восприя́тие** һиҙеү аша үҙләштереү **2.** енси хискә (тойғоға) бирелеүсән (бирелгән, ҡоролған), шәһүәтле; **чу́вственная любо́вь** енси хискә ҡоролған мөхәббәт

**ЧУВСТВИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** һиҙгерлек; **чувстви́тельность приёмника** приёмниктың һиҙгерлеге **2.** (*сентиментальность*) әҫәрләнеүсәнлек, нескәлек, хислелек **3.** (*способность воспринимать раздражения*) тойоусанлыҡ, һиҙеүсәнлек; **па́льцы потеря́ли чувстви́тельность** бармаҡтар

тойоусанлығын юғалтҡан; **чувстви́тельность кле́ток** күҙәнәктәрҙең һиҙеүсәнлеге

**ЧУВСТВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*впечатлительный*) һиҙгер, һиҙеүсән, тойоусан; **чувстви́тельное се́рдце** һиҙгер йөрәк; **чувстви́тельный челове́к** һиҙгер кеше **2.** (*трогательный*) тәрән хисле, нескә күңелле, нескә тойғоло; **чувстви́тельный рома́нс** тәрән хисле романс **3.** ярһыусан, ҡуҙғыусан, тойоусан, һиҙеүсән, һиҙгер; **чувстви́тельные не́рвы** ярһыусан нервылар **4.** (*ощутимый*) һиҙелерлек, күренерлек; **чувстви́тельная ра́зница** һиҙелерлек айырма

**ЧУ́ВСТВО** *с* **1.** *в разн. знач.* тойоу, һиҙеү; **о́рганы чувств** һиҙеү ағзалары **2.** *обычно мн.* иҫ, һуш; **прийти́ в чу́вство** иҫкә килеү; **упа́сть без чувств** һушһыҙ йығылыу; **привести́ в чу́вство** иҫенә килтереү **3.** *чего, какое* тойғо, хис; **чу́вство жа́лости** ҡыҙғаныу тойғоһо; **чу́вство отве́тственности** яуаплылыҡ тойғоһо **4.** (*любовь к кому-л.*) тойғо, мөхәббәт; **большо́е чу́вство** оло тойғо ♦ **чу́вство ло́ктя** *см.* **ло́коть**; **шесто́е чу́вство** *см.* **шесто́й**; **в растрёпанных чу́вствах** *см.* **растрёпанный**

**ЧУ́ВСТВОВАТЬ** *несов. что* **1.** *в разн. знач.* һиҙеү, тойоу; **чу́вствовать хо́лод** һалҡынлыҡты һиҙеү; **чу́вствовать тепло́** йылыны тойоу; **чу́вствовать красоту́** матурлыҡты тойоу **2.** (*осознавать*) аңлау, төшөнөү, тойоу; **чу́вствовать свои́ недоста́тки** үҙеңдең етешһеҙлектәреңде аңлау; **чу́вствовать отве́тственность** яуаплылыҡ тойоу; **чу́вствовать свою́ вину́** үҙ ғәйебеңде аңлау ♦ **дава́ть чу́вствовать** *кому* белдереү, һиҙҙереү; **чу́вствовать себя́** *как, кем, каким нисектер, кемдер итеп* үҙеңде тойоу (хис итеү); **дава́ть себя́ чу́вствовать** һиҙҙереү, белдереү

**ЧУ́ВСТВОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** һиҙелеү, тойолоу; **чу́вствуется приближе́ние о́сени** көҙ яҡынлашыуы һиҙелә; **боль чу́вствуется** ауыртыу һиҙелә; **за́пах чу́вствуется** еҫ тойола **2.** *страд. от* **чу́вствовать**

**ЧУГУ́Н** *м* **1.** суйын; **вы́плавка чугуна́** суйын иретеү **2.** (*чугунный сосуд*) суйын (*һауыт, сүлмәк*)

**ЧУГУ́ННЫЙ,** -ая, -ое суйын; **чугу́нная пу́шка** суйын туп; **чугу́нный котёл** суйын сүлмәк ♦ **чугу́нная доро́га** *уст.* суйын юл, тимер юл

**ЧУГУНОЛИТЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* суйын ҡойоу ...ы; **чугунолите́йный цех** суйын ҡойоу цехы

**ЧУДА́К** *м* и **ЧУДА́ЧКА** *ж* сәйер, һармаҡ

**ЧУДАКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое сәйерерәк, ҡыҙыҡ ҡына, һармағыраҡ; **чудакова́тый стари́к** сәйерерәк ҡарт

**ЧУДА́ЧЕСТВО** *с* **1.** (*странность*) сәйерлек, һармаҡлыҡ; **быть изве́стным свои́м чуда́чеством** сәйерлегең менән билдәле булыу **2.** ҡыланыш; (*озорство*) шуҡлыҡ, шаянлыҡ, шаяртыу; **неожи́данные чуда́чества** көтөлмәгән шуҡлыҡтар

**ЧУДЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*являющийся чудом*) мөғжизәле, ғәжәп; **чуде́сное исцеле́ние** мөғжизәле һауығыу **2.** (*волшебный*) мөғжизәле, һоҡландырғыс, тылсымлы, сихри; **чуде́сные ска́зки** тылсымлы әкиәттәр **3.** *см.* **чу́дный** 2; **чуде́сный день** иҫ киткес матур көн; **у него́ сего́дня чуде́сный вид** уның ҡиәфәте бөгөн бына тигән

**ЧУДИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** сәйер ҡыланыу, ахмаҡлыҡтар эшләү, йүләрләнеү **2.** (*дурачиться*) шаярыу, шуҡлыҡ эшләү

**ЧУ́ДИТЬСЯ** *несов. безл.*; *разг.* тойолоу, -ған/-гән кеүек (һымаҡ, шикелле) булыу (күренеү, тойолоу, ишетелеү һ.б.); **мне чу́дилось, что кто́-то вошёл** миңә кемдер ингән һымаҡ булды; **ему́ чу́дится стук** уға шаҡылдау ишетелгән кеүек була

**ЧУДНО́** *разг.* **1.** *нареч.* ғәжәп, сәйер, әкәмәт; **он говори́т чудно́** ул сәйер һөйләшә **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* (*удивительно, поразительно*) ғәжәп, сәйер, аптырарлыҡ; **чудно́, не ве́рится** ғәжәп, ышанып та булмай

**ЧУДНО́Й,** -ая, -ое *разг.* ғәжәп, сәйер, әкәмәт; **чудно́й чело́век** сәйер кеше

**ЧУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*волшебный*) мөғжизәле, һоҡландырғыс, тылсымлы, сихри; **чу́дная мело́дия** тылсымлы моң **2.** (*прекрасный*) иҫ киткес матур, ғәжәп, бына тигән, бик яҡшы (матур, һәйбәт)

**ЧУ́ДО** *с* **1.** (*мн.* **чудеса́**) мөғжизә, кәрәмәт; **соверши́ть чу́до** кәрәмәт яһау; **наде́яться на чу́до** мөғжизә көтөү **2.** (*мн.* **чудеса́**) ғәҙәттән тыш хәл, иҫ китерлек нәмә; **расска́зывать чудеса́** *о ком-л. кемдер тураһында* иҫ китерлек нәмәләр һөйләү **3.** мөғжизә; **чу́до иску́сства** сәнғәт мөғжизәһе; **чудеса́ герои́зма** ҡаһарманлыҡ мөғжизәләре **4.** *в знач. нареч.* или *мест.* мөғжизә менән; **каки́м-то чу́дом** ниндәйҙер мөғжизә менән **5.** *в знач. сказ.* ғәжәп, ғәжәп матур, иҫ киткес (шәп), ғәҙәттән тыш; **как пля́шет, чу́до!** нисек бейей, иҫ киткес!; **как бы́ло ве́село — чу́до!** ғәжәп күңелле булды **6.** (*мн.* **чу́да**) (*сказочное существо*) эйә, ғәжәп йән эйәһе; **чу́до морско́е** диңгеҙ эйәһе ♦ **чу́до как...** бик (*яҡшы сифаттар тураһында*); **не чу́до** аптырарлыҡ түгел; **чудеса́ в решете́** *см.* **решето́**

**ЧУДО́ВИЩЕ** *с* **1.** (*фантастическое существо устрашающего вида*) ҡурҡыныс зат **2.** (*о животном огромных размеров*) ғифрит **3.** *перен.* (*о жестоком человеке*) ҡанһыҙ (рәхимһеҙ) кеше

**ЧУДО́ВИЩНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*страшный*) ҡурҡыныс, ҡот осҡос; **чудо́вищное существо́** ҡот осҡос зат **2.** ғәҙәттән тыш; **чудо́вищная толщина́ ствола́ де́рева** ағас олононоң ғәҙәттән тыш йыуанлығы **3.** *перен.* ҡот осҡос, иҫ китмәле, ғәҙәттән тыш; **чудо́вищные фа́кты** иҫ китмәле факттар; **чудо́вищное преступле́ние** ҡот осҡос енәйәт

**ЧУДОДЕ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое мөғжизәле, тылсымлы, иҫ киткес яҡшы; **чудоде́йственная си́ла** тылсымлы көс; **чудоде́йственное лека́рство** иҫ киткес яҡшы дарыу

**ЧУДОТВО́РЕЦ** *м* **1.** мөғжизәләр тыуҙырыусы **2.** иҫ киткес (таң ҡалырлыҡ) эштәр күрһәтеүсе (башҡарыусы)

**ЧУДОТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мөғжизәле; **чудотво́рная ико́на** мөғжизәле тәре **2.** мөғжизәле, ғәжәп; **чудотво́рный ю́жный кли́мат** көньяҡтың ғәжәп климаты

**ЧУЖА́К** *м* и **ЧУЖА́ЧКА** *ж*; *разг.* сит (ят) кеше

**ЧУЖБИ́НА** *ж* сит (ят) ер (ил); **оказа́ться на чужби́не** сит ергә барып сығыу

**ЧУЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *кого-чего* ситләшеү, ситһенеү, ятһыныу; **чужда́ться друзе́й** дуҫтарҙан ситләшеү **2.** *чего* азат булыу, булмау; **чужда́ться за́висти** көнсөллөктә белмәү

**ЧУ́ЖДЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **чужо́й** 1, 2, 4; **2.** ят, сит, башҡа; **чу́ждые взгля́ды** ят ҡараштар **3.** *чего* (*не обладающий чем-л.*) азат, белмәүсе, сит (ят) күреүсе; **челове́к, чу́ждый за́висти** көнсөллөктән азат кеше

**ЧУЖЕЗЕ́МЕЦ** *м*; *уст.* сит ил (ер) кешеһе

**ЧУЖЕЗЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* сит ил (ер) ...ы; **чужезе́мные това́ры** сит ил тауарҙары

**ЧУЖО́Й,** -ая, -ое **1.** (*принадлежащий другим*) кеше ...ы, башҡа (сит, икенсе) кеше ...ы; **чужи́е ве́щи** кеше әйберҙәре; **назва́ться чужи́м и́менем** башҡа кеше исеме менән йөрөү **2.** (*незнакомый для других*) таныш булмаған; **чужо́й взгляд** таныш булмаған ҡараш **3.** *в знач. сущ.* **чужо́е** *с* башҡаныҡы, кешенеке; **взять чужо́е** кешенекен алыу **4.** *в разн. знач.* сит, ят; **чужи́е лю́ди** ят кешеләр; **чужи́е де́ти** ят балалар; **чужа́я сторона́** сит яҡ; **чужо́й язы́к** сит тел; **чужи́е обы́чаи** ят ғөрөф-ғәҙәттәр ♦ **чужи́ми рука́ми (де́лать)** *что ниmәнелер* башҡаларҙан эшләтеү; **чужи́ми рука́ми жар загреба́ть** *см.* **жар**; **в чужо́м пиру́ похме́лье** ҡара эт бәләһе аҡ эткә; **в чужи́е ру́ки (попада́ть, дава́ть и т.п.)** сит, ят кешеләргә (эләгеү, биреү һ.б.); **с чужо́го го́лоса петь** *см.* **го́лос**; **с чужи́х слов** кеше аша ғына ишетеп; **есть чужо́й хлеб** кеше икмәген ашау, башҡалар иҫәбенә йәшәү

**ЧУКО́ТСКИЙ,** -ая, -ое чукча ...ы, Чукотка ...ы; **чуко́тский язы́к** чукча теле

**ЧУ́КЧИ** *мн.* чукчалар, чукча халҡы // *ед.* **чу́кча** *м* чукча ир-аты; **чу́кча** и **чукча́нка** *ж* чукча ҡатын-ҡыҙы

**ЧУЛА́Н** *м* солан

**ЧУЛКИ́** *мн.* (*ед.* **чуло́к** *м*) ойоҡ(тар); **шерстяны́е чулки́** йөн ойоҡ

**ЧУЛО́ЧНИК** *м* и **ЧУЛО́ЧНИЦА** *ж* ойоҡ бәйләүсе

**ЧУЛО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ойоҡ ...ы; **чуло́чная фа́брика** ойоҡ фабрикаһы **2.** ойоҡлоҡ, ойоҡ ...ы; **чуло́чная пря́жа** ойоҡлоҡ еп (йөн) ♦ **чуло́чные изде́лия** ойоҡ һәм ойоҡбаштар

**ЧУМ** *м* чум (*Төньяҡ халыҡтарының ҡусмә торлаҡ исеме*)

**ЧУМА́** *ж* чума, тағун (*йогошло ауырыу*)

**ЧУМА́ЗЫЙ,** -ая, -ое *разг.* бысраҡ, бысраҡҡа батҡан, ҡаҡашҡан

**ЧУМИ́ЗА** *ж* могар (*тары һымаҡ ашлыҡ*)

**ЧУМНО́Й,** -ая, -ое **1.** чума ...ы; **чумно́й микро́б** чума микробы; **чумна́я эпиде́мия** чума эпидемияһы **2.** (*заражённый чумой*) чума йоҡторған, чумалы (*чума менән ауырыған*); **чумно́й бык** чумалы үгеҙ **3.** *в знач. сущ.* **чумно́й** *м* и **чумна́я** *ж* чума менән ауырыған кеше, чумалы кеше; **осмотре́ть чумно́го** чума менән ауырыған кешене ҡарау **4.** *см.* **чумово́й**

**ЧУМОВО́Й,** -ая, -ое *прост.* (*шальной, очумелый*) тиле, йүләрләнгән, аҡылдан яҙған, иҫәрләнгән

**ЧУР** *межд.* **1.** (*обычно со словами "меня", "нас"*) теймә, оронма, тотонма, ҡағылма; **чур меня́** теймә миңә **2.** *разг.* туҡта, тыңла, ҡара, баҡ; **чур попола́м** ҡара, табылған уртаҡ

**ЧУРА́ТЬСЯ** *несов. кого-чего*; *разг.* һаҡланыу, ситләшеү, ҡасыу; **чура́ться рабо́ты** эштән ҡасыу

**ЧУРБА́Н** *м* **1.** бүкән, түмәр, тумрау; **распи́ливать чурба́н** түмәр бысыу **2.** *бран.* (*о человеке*) күҙле бүкән, аңра, йүнһеҙ

**ЧУРЕ́К** *м* сүрәк, табикмәк

**ЧУ́РКА** *ж* түмәр, тумрау

**ЧУ́ТКИЙ,** -ая, -ое **1.** һиҙгер, үткер, һаҡ, уяу; **чу́ткая соба́ка** һиҙгер эт; **чу́ткое у́хо** һаҡ ҡолаҡ **2.** (*отзывчивый, внимательный*) һиҙгер, иғтибарлы, хәстәрле; **чу́ткое отноше́ние к лю́дям** кешеләргә хәстәрле мөнәсәбәт; **чу́ткий подхо́д** иғтибарлы булыу ♦ **чу́ткий сон (дремо́та, забытьё)** һаҡ йоҡо

**ЧУ́ТКОСТЬ** *ж* **1.** һиҙгерлек, үткерлек, һаҡлыҡ, уяулыҡ; **чу́ткость слу́ха** ишетеү һиҙгерлеге **2.** һиҙгерлек, иғтибарлылыҡ, хәстәрлек; **прояви́ть чу́ткость** иғтибарлылыҡ күрһәтеү

**ЧУ́ТОЧКА** *ж*; *разг.* **1.** аҙ ғына, саҡ ҡына **2.** *в знач. нареч.* **чу́точку** бер аҙ, бер аҙ ғына, аҙ ғына; **подви́нься чу́точку** бер аҙ ғына күс әле ♦ **ни чу́точки** саҡ ҡына ла, аҙ ғына ла, бер ҙә, һис тә

**ЧУТЬ** *нареч.* и *союз* **1.** *нареч.* (*еле, едва*) көскә генә, көскә-көскә, саҡ-саҡ, саҡ ҡына, бер аҙ, аҙ ғына; **чуть бо́льше** бер аҙ ҙурыраҡ; **чуть живо́й** саҡ ҡына йәне бар; **чуть прихра́мывать** саҡ ҡына аҡһау **2.** *союз* (*как только, едва только*) менән үк, -ғас та/-гәс тә, -ғас уҡ/-гәс үк; **я вы́шел в путь, чуть заняла́сь заря́** таң беленә башлағас уҡ юлға сыҡтым, таң һыҙыла башлау менән үк юлға сыҡтым ♦ **чуть бы́ло не...** саҡ ҡына -маны/-мәне, аҙ ғына -маны/-мәне; **чуть дыша́ть** саҡ-саҡ ҡына тороу; **чуть (ли) не...** ихтимал, буғай, булһа кәрәк; **чуть свет** ҡара таңдан, бик иртә; **чуть что** саҡ ҡына бер ни булһа, шунда уҡ

**ЧУТЬЁ** *с* **1.** һиҙеү, тойоу, һиҙеүсәнлек; **чутьё ослабе́ло** еҫ һиҙеүсәнлек кәмене **2.** *перен.* һиҙгерлек, һиҙемләү, зирәклек, уяулыҡ; **языково́е чутьё** тел нескәлектәрен айыра белеү зирәклеге; **чутьё гео́лога** геолог һиҙгерлеге

**ЧУТЬ-ЧУ́ТЬ** *нареч. см.* **чуть**

**ЧУ́ЧЕЛО** *с* **1.** толоп; **чу́чело попуга́я** тутыйғош толобо **2.** (*пугало*) ҡараҫҡы; **огоро́дное чу́чело** баҡса ҡараҫҡыһы **3.** (*о грязном человеке*) ҡараҫҡы, шөкәтһеҙ (шыҡһыҙ) кеше ♦ **чу́чело горо́ховое** *см.* **горо́ховый**

**ЧУ́ШКА** *ж* **1.** *прост.* (*поросёнок*) суҫҡа (дуңғыҙ) балаһы **2.** *спец.* (*слиток металла*) ҡойолма, киҫәк

**ЧУШЬ** *ж*; *разг.* сафсата, буш һүҙ, юҡ-бар; **городи́ть чушь** буш һүҙ һөйләү

**ЧУ́ЯТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*о животных*) һиҙеү, тойоу; **чу́ять во́лчий дух** бүре еҫен һиҙеү **2.** *что*; *перен.*, *прост.* һиҙеү, һиҙенеү, тойоу; **чу́ет моё се́рдце** минең йөрәгем һиҙенә **3.** (*понимать, сознавать*) белеү, аңлау ♦ **ног (земли́) под собо́й не чу́ять** оло ҡыуаныс кисереү

**ЧУ́ЯТЬСЯ** *несов.*, *прост.* **1.** һиҙелеү, тойолоу; **чу́ялось приближе́ние весны́** яҙ яҡынлашыуы һиҙелә ине **2.** *безл.* (*чудиться, казаться*) тойолоу **3.** *страд. от* **чу́ять**

# Ш

**ША́БАШ** *м* **1.** шабаш (*йәһүдтәрҙә шәмбе көн ял итеү*) **2.** *чего, какой*; *перен.* (*неистовый разгул*) ҡотороноп типтереү, кәйеф-сафа ҡороу

**ШАБА́Ш** *м*; *прост.* **1.** (*окончание работы*) шабаш; **объяви́ть шаба́ш** шабаш иғлан итеү **2.** *в знач. сказ.* шабаш (*эшселәргә бирелгән "тукта!" тигән команда*) **3.** *в знач. сказ.* етте, бөттө, булды, вәссәләм; **нет, шаба́ш! испра́влюсь** юҡ, етте! төҙәләм

**ШАБА́ШИТЬ** *несов.*; *разг.* (*работать для дополнительного заработка*) шабашлыҡ итеү, аҡса һуғыу

**ШАБА́ШНИК** *м*; *прост.* шабашник, шабашсы; **прие́хали шаба́шники** шабашсылар килде

**ША́БЕР** *м*; *тех.* шабер, ҡырғыс, йөҙләгес (*эш ҡорамалы*)

**ШАБЛО́Н** *м* **1.** (*образец*) шаблон, өлгө, ҡалып, үрнәк **2.** *перен.* (*штамп*) шаблон, таушалған (тапалған, әҙер) ҡалып; **написа́ть расска́з по шабло́ну** әҙер ҡалып буйынса хикәйә яҙыу

**ШАБЛО́ННОСТЬ** *ж* ҡалыплылыҡ, таушалғанлыҡ, шаблонлыҡ; **шабло́нность рассужде́ний** фекер йөрөтөүҙең шаблонлығы

**ШАБЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** өлгө (ҡалып) буйынса эшләнгән, шаблонлы; **шабло́нное изде́лие** өлгө буйынса эшләнгән әйбер **2.** *перен.* күп туҡылған (сәйнәлгән), тапалған, таушалған, шаблон; **шабло́нное выраже́ние** тапалған әйтем

**ША́БРИТЬ** *несов. что*; *тех.* шабер (ҡырғыс, йөҙләгес) менән эшкәртеү (ҡырыу)

**ША́ВКА** *ж*; *разг.* сәүек эт

**ШАГ** *м* **1.** аҙым, атлам; **сде́лать не́сколько шаго́в** бер нисә аҙым яһау **2.** (*звуки шагов*) аяҡ тауыш(тар)ы; **раздаю́тся шаги́** аяҡ тауыштары ишетелә **3.** (*темп движения при ходьбе, походка*) аҙым, йөрөш, атлау; **уско́рить шаг** аҙымды тиҙләтеү, тиҙерәк атлау; **заме́длить шаг** атлауҙы аҡрынайтыу, аҡрынраҡ атлау; **идти́ ме́лкими шага́ми** ваҡ аҙымдар менән атлау, ваҡ-ваҡ атлау **4.** *перен.* аҙым, хәрәкәт, сара; **необду́манный шаг** уйланмай яһалған аҙым; **риско́ванный шаг** хәүефле аҙым; **сде́лать ну́жные шаги́** кәрәкле саралар үткәреү **5.** *тех.* аҙым, ара, ҙурлыҡ; **шаг резьбы́** һырҙар араһы ♦ **гига́нтскими (семими́льными) шага́ми идти́ (дви́гаться) вперёд** *см.* **гига́нтский**; **пе́рвые шаги́** тәүге аҙымдар; **черепа́шьим ша́гом идти́ (дви́гаться) вперёд** бик яй үҫеү, бик бәләкәй уңыштарға ирешеү; **в не́скольких (двух, трёх) шага́х** бик яҡын, эргәлә; **на ка́ждом шагу́**; **что ни шаг** өҙлөкһөҙ, бер туҡтауһыҙ, аҙым һайын; **оди́н шаг (на шаг)** *от чего, до чего* бик яҡын; **шаг вперёд** бер ни тиклем уңышҡа ирешеү; **шаг за ша́гом**: 1) яй ғына, саҡ-саҡ; 2) тайпылышһыҙ, эҙмә-эҙлекле рәүештә; **ша́гом марш!** атларға!; **отбива́ть (печа́тать, чека́нить и т.п.) шаг** шаҡылдата баҫыу, матур итеп атлау; **идти́ (шага́ть) шаг в шаг** *с кем* бер аяҡтан атлау, бер тактта атлау; **сби́ться с ша́га** тигеҙ атламау, такттан тайпылыу; **ни на шаг**; **ни ша́гу** бер ҡайҙа ла, бер аҙым да; **ни ша́гу наза́д (да́льше, вперёд и т.п.)** урындан ҡуҙғалмаҫҡа; **ша́гу нельзя́ ступи́ть** бер аҙым да баҫа алмау (*берәйһенең ярҙамынан тыш*)

**ШАГА́ТЬ** *несов.* **1.** атлау, атлап килеү (барыу, китеү); **шага́ть ро́вно** тигеҙ атлау **2.** (*переступать*) аша (үтә) атлау (атлап сығыу); **шага́ть че́рез поро́г** тупһа аша атлау **3.** *разг.* (*идти*) атлау, китеп барыу; **далеко́ ли шага́ешь?** алыҫҡа китеп бараһыңмы? **4.** *перен.*, *разг.* (*продвигаться, развиваться в каком-л. направлении*) үрләү, алға (үрләп) китеү, юғары күтәрелеү

**ШАГА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **шага́ть** **2.** *прил.* атлаусы, атлап йөрөүсе, үҙйөрөшлө; **шага́ющий экскава́тор** үҙйөрөшлө экскаватор

**ШАГНУ́ТЬ** *сов. см.* **шага́ть**; **шагну́ть в сто́рону** ситкә баҫыу ♦ **шагну́ть нельзя́ (не даю́т)** эш эшләргә ирек булмау, аяҡ атлар әмәл юҡ

**ША́ГОМ** *нареч.* **1.** (*не бегом*) атлап (ҡына) **2.** (*не рысью*) атлатып, атлап; **пусти́ть ло́шадь ша́гом** атты атлатып барыу

**ШАГОМЕ́Р** *м* аҙым үлсәгес

**ШАГРЕ́НЕВЫЙ,** -ая, -ое шигрин, шигрин ...ы; **шагре́невое произво́дство** шигрин етештереү; **шагре́невая ко́жа** шигрин күн

**ШАГРЕ́НЬ** *ж* шигрин (*йомшаҡ күн*)

**ШАЖКО́М** *нареч.*; *разг.* ваҡ-ваҡ баҫып атлау

**ША́ЙБА** *ж*; *в разн. знач.* шайба; **подложи́ть ша́йбу** *тех.* шайба һалыу (кейҙереү); **заби́ть ша́йбу** *спорт.* шайба һуғып индереү

**ША́ЙКА I** *ж* шайка, өйөр, төркөм (*енәйәт ҡылыусы*); **атама́н банди́тской ша́йки** бандиттар төркөмөнөң атаманы; **воровска́я ша́йка** ҡараҡтар өйөрө

**ША́ЙКА II** *ж* (*сосуд*) лаҡан; **ба́нная ша́йка** мунса лаҡаны

**ШАЙТА́Н** *м*; *в разн. знач.* шайтан

**ШАКА́Л** *м* сүл бүреһе, шакал

**ШАКА́ЛИЙ,** -ья, -ье сүл бүреһе ...ы, шакал ...ы; **шака́лья ста́я** сүл бүреһе өйөрө

**ШАЛА́НДА** *ж* шаланда (**1.** *йөк тейәү, бушатыу, ҡом ташыу өсөн тәғәйенләнгән, һай урындарҙа туҡтай алған баржа* **2.** *Ҡара диңгеҙҙә йөҙә торған йәйпәк төплө, елкәнле балыҡ тотоу кәмәһе*)

**ШАЛА́Ш** *м* ҡыуыш; **охо́тничий шала́ш** һунарсы ҡыуышы

**ША́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое шәл ...ы; **ша́левый узо́р** шәл биҙәге ♦ **ша́левый воротни́к** *см.* **шаль**

**ШАЛЕ́ТЬ** *несов.*; *прост.* шашыу, ҡотороу; **шале́ть от ра́дости** шатлыҡтан ҡотороу

**ШАЛИ́ТЬ** *несов.* **1.** шаярыу, шуҡланыу, тыйнаҡһыҙланыу; **ребёнок шали́т** бала шаяра **2.** *разг.* дөрөҫ эшләмәү; **часы́ шаля́т** сәғәт дөрөҫ эшләмәй **3.** (*быть не вполне здоровым*) ҡаҡшау, шаярыу; **не́рвы шаля́т** нервылар шаяра **4.** *во 2 л. ед. ч. наст. вр.* **шали́шь** (*при возражении*) шаярма, улай булмай торһон әле

**ШАЛОВЛИ́ВОСТЬ** *ж* шаянлыҡ, шуҡлыҡ

**ШАЛОВЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое шаян, шуҡ; **шаловли́вая де́вочка** шаян ҡыҙ

**ШАЛОПА́Й** *м*; *разг.* шалапай, эшлекһеҙ, елғыуар

**ШАЛОПА́ЙНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* елғыуарланыу, шалапайланыу, эшлекһеҙлек күрһәтеү

**ША́ЛОСТЬ** *ж* шаянлыҡ, йүләрлек, шуҡлыҡ, дыуамаллыҡ; **де́тская ша́лость** балалар шуҡлығы

**ШАЛУ́Н** *м* и **ШАЛУ́НЬЯ** *ж* шаян, шуҡ

**ШАЛУНИ́ШКА** *м*; *уменьш. от* **шалу́н**

**ШАЛФЕ́Й** *м* шалфей, йылан тамыры; **за́пах шалфе́я** шалфей еҫе

**ШАЛЬ** *ж* шәл; **пухо́вая шаль** дебет шәл ♦ **воротни́к ша́лью** шәл яға

**ШАЛЬНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*безумный, выражающий безумие*) аҡылын юғалтҡан, йүләрләнгән, шашҡан, тиле, тилергән, дыуамал; **шально́й челове́к** тиле кеше; **име́ть шально́й вид** аҡылын юғалтҡан ҡиәфәттә булыу **2.** (*безрассудный*) дыуамал, самаһыҙ, йүгәнһеҙ, тотанаҡһыҙ; **шальна́я фанта́зия** йүгәнһеҙ фантазия; **шальна́я мысль** дыуамал уй **3.** (*случайный — о пуле, снаряде*) осраҡлы, аҙашҡан, яҙатайым; **шальна́я пу́ля** осраҡлы пуля ♦ **шальна́я голова́** дыуамал баш; **шальны́е де́ньги** көс түкмәйенсә, еңел табылған (елдән килгән) күп аҡса

**ШАМА́Н** *м* шаман

**ШАМАНИ́ЗМ** *м см.* **шама́нство** 1

**ШАМА́НСКИЙ,** -ая, -ое шаман ...ы, шаманлыҡ ...ы; **шама́нский бу́бен** шаман шөңгөрө; **шама́нский обря́д** шаманлыҡ йолаһы

**ШАМА́НСТВО** *с* шаманлыҡ (**1.** *Африка, Азия, Үҙәк Америка һәм Полинезияның ҡайһы бер халыҡтарында ҡамлау ваҡытында шамандың ғәжәйеп көстәргә тәьҫир итә алыуына ышанған анимистик ҡараш* **2.** *шамандар шөғөлө*)

**ША́МКАНЬЕ** *с см.* **ша́мкать**

**ША́МКАТЬ** *несов.*; *разг.* (*говорить невнятно*) бышылдау, бышылдап һөйләү

**ШАМО́Т** *м*; *тех.* шамот (*утҡа сыҙамлы балсыҡ*)

**ШАМПА́НСКОЕ** *с* шампанский, шампан шарабы; **пить шампа́нское** шампанский эсеү

**ШАМПИНЬО́Н** *м* аҡ көләпә, шампиньон (*ашауға яраҡлы бәшмәк*)

**ШАМПУ́НЬ** *м* шампунь; **мыть го́лову шампу́нем** башты шампунь менән йыуыу

**ШАМПУ́Р** *м* шампур, шеш (*шашлыҡ ҡыҙҙырыу өсөн ҡулайлама*)

**ШАНКР: мя́гкий шанкр** *мед.* шанкр (*йоғошло енси ауырыу*); **твёрдый шанкр** *мед.* йәрәхәт (*сифилис йоҡҡан урында барлыҡҡа килгән язва*)

**ШАНС** *м* өмөт, ышаныс, мөмкинлек; **оди́н шанс из ста** йөҙҙән бер мөмкинлек; **после́дний шанс** һуңғы өмөт

**ШАНСОНЕ́ТКА** *ж* шансонетка (**1.** *шаян еңелсә йыр, ғәҙәттә әҙәпһеҙ йөкмәткеле* **2.** *йырсы*)

**ШАНТА́Ж** *м* шантаж, янау, ҡурҡытыу; **полити́ческий шанта́ж** сәйәси шантаж; **занима́ться шантажо́м** шантаж менән шөғөлләнеү

**ШАНТАЖИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* шантаж яһау, шантажлау

**ШАНТАЖИ́СТ** *м* и **ШАНТАЖИ́СТКА** *ж* шантажсы

**ШАНТРАПА́ 1.** *м* и *ж*; *прост.*, *бран.* йүнһеҙ кеше, этрәгәләм **2.** *ж собир.* юҡ-бар кешеләр

**ША́ПКА** *ж* **1.** шапка; (*меховая*) бүрек, кәпәс; **но́рковая ша́пка** шәшке бүрек; **вя́заная ша́пка** бәйләнгән шапка **2.** *чего*; *перен.* баш, ос; **ша́пки стого́в** кәбән баштары **3.** (*заголовок в газете*) дөйөм баш ♦ **дать по ша́пке** *прост.* ҡыуыу, һөрөү; **на во́ре ша́пка гори́т** ҡараҡтың бүрке яна; **получи́ть по ша́пке** *прост.* ҡыуылыу, һөрөлөү; **по Се́ньке ша́пка** силәгенә күрә ҡапҡасы; **ша́пками закида́ем** бүрек менән бәреп йығыу, бер ни тормау, еңел генә отоу (*маҡтанып әйтелә*); **лома́ть ша́пку** *см.* **лома́ть**; **ша́пка-невиди́мка** *см.* **невиди́мка**

**ША́ПОЧКА** *ж*; *уменьш. от* **ша́пка** 1

**ША́ПОЧНИК** *м* бүрексе (*бүрек тегеүсе*)

**ША́ПОЧНЫЙ,** -ая, -ое бүрек ...ы, кәпәс ...ы, бүрек (кәпәс) тегеү ...ы; **ша́почная мастерска́я** бүрек тегеү оҫтаханаһы ♦ **ша́почное знако́мство** осраҡлы танышлыҡ, яҡындан таныш булмау; **ша́почный знако́мый** осраҡлы таныш; **прийти́ к ша́почному разбо́ру** туйҙан һуң дөмбөргә

**ШАР** *м*; *в разн. знач.* шар, тупалаҡ; **ра́диус ша́ра** шар радиусы; **билья́рдные шары́** бильярд шарҙары; **баллотиро́вка шара́ми** *уст.* шарҙар менән тауыш биреү ♦ **Земно́й шар** Ер шары; **возду́шный шар** һауа шары; **хоть шаро́м покати́** бер нәмә лә юҡ, буп-буш, елдәр иҫкән

**ШАРАБА́Н** *м* **1.** еңел арба (*дүрт тәгәрмәсле, кеше ултыра торған рәт-рәт эскәмйәләр менән*) **2.** (*кабриолет*) ҡуян арба

**ШАРА́ДА** *ж* шарада (*уйын-табышмаҡ*); **соста́вить шара́ду** шарада төҙөү

**ШАРА́ХАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **шара́хнуться 2.** *перен.*, *разг.* (*сторониться кого-л.*) ситләшеү, ситкә тайпылыу

**ШАРА́ХНУТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *кого-что* и *без доп.* бәреү, һуғыу, тондороу, ҡундырыу **2.** (*выстрелить*) атыу, гөрһөлдәтеү; **шара́хнуть из пулемёта** пулемёттан атыу **3.** *см.* **шара́хнуться**

**ШАРА́ХНУТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*отпрянуть*) ситкә тайпылыу (ташланыу); **ло́шадь шара́хнулась в сто́рону** ат ситкә тайпылды **2.** *прост.* (*сильно удариться*) килеп бәрелеү, ныҡ итеп һуғылыу; **ло́дка шара́хнулась о бе́рег** кәмә ярға килеп бәрелде

**ШАРЖ** *м* шарж (*шаян һүрәт*)

**ШАРЖИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* и *без доп.* шаржлаштырыу, шарж рәүешендә биреү

**ШАРИА́Т** *м* шәриғәт (*мосолман дини һәм хоҡуҡи нормалар йыйылмаһы*); **кано́ны шариа́та** шәриғәт ҡанундары

**ША́РИК** *м* **1.** *уменьш. от* **шар 2.** *физиол.* бөртөксә; **бе́лые кровяны́е ша́рики** аҡ ҡан бөртөксәләре; **кра́сные кровяны́е ша́рики** ҡыҙыл ҡан бөртөксәләре

**ША́РИКОВЫЙ,** -ая, -ое шариклы; **ша́риковый подши́пник** шариклы подшипник; **ша́риковая ру́чка** шариклы ручка

**ШАРИКОПОДШИ́ПНИК** *м* шарикоподшипник

**ШАРИКОПОДШИ́ПНИКОВЫЙ,** -ая, -ое шарикоподшипник ...ы; **шарикоподши́пниковый заво́д** шарикоподшипник заводы

**ША́РИТЬ** *несов.* **1.** (*искать ощупью*) аҡтарыу, һәрмәнеү, аҡтарыныу, ҡапшау, аҡтарынып (ҡапшап, һәрмәнеп) эҙләү; **ша́рить в карма́нах** кеҫәләрҙе аҡтарып эҙләү **2.** *разг.* (*разыскивать*) эҙләү, эҙләнеү; **ша́рить по дома́м** йорттарҙа эҙләнеү ♦ **ша́рить глаза́ми (взгля́дом)** ныҡ итеп ҡарау, текләү, текләп китеү

**ША́РКАТЬ** *несов.* **1.** ҡыштырлатыу, шығырлатыу, лаштырлатыу; **ша́ркать ту́флями** туфлиҙар менән лаштырлатыу; **ша́ркать нога́ми** аяҡ ҡыштырлатыу **2.** (*при приветствии*) аяҡты аяҡҡа бәреп шаҡылдатыу

**ША́РКНУТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *см.* **ша́ркать** 2; **2.** (*неожиданно ударить*) кинәт һуғып (атып) ебәреү **3.** (*с силой бросить*) ташлап (һирпеп) ебәреү **4.** (*неожиданно и стремительно броситься куда-л.*) ҡапыл сабып (йүгереп) сығып китеү

**ШАРЛАТА́Н** *м* шарлатан, алдаҡсы, елғыуар

**ШАРЛАТА́НИТЬ** *несов.* шарлатанланыу (*эште алдауға, хәйләгә ҡороу*)

**ШАРЛАТА́НСТВО** *с* шарлатанлыҡ, алдаҡсылыҡ; **занима́ться шарлата́нством** шарлатанлыҡ менән шөғөлләнеү

**ШАРМА́НКА** *ж* шарманка ♦ **завести́ (крути́ть и т.п.) шарма́нку** *прост.* бер үк балыҡ башын сәйнәү, бер үк һүҙҙе туҡыу

**ШАРМА́НЩИК** *м* шарманкасы (*шарманка уйнаусы*)

**ШАРНИ́Р** *м* күгән; **болтовы́е шарни́ры** болтлы күгәндәр

**ШАРНИ́РНЫЙ,** -ая, -ое күгәнле; **шарни́рный механи́зм** күгәнле механизм

**ШАРОВА́РЫ** *мн.* салбар; **лы́жные шарова́ры** саңғы салбары

**ШАРОВА́ТЬ** *сов., несов. что*; *с.-х.* рәт араларын йомшартыу

**ШАРОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое тумалаҡ, шар һымаҡ, йомро; **шарови́дные ка́ктусы** шар һымаҡ кактустар

**ШАРО́ВКА** *ж*; *с.-х. см.* **шарова́ть**

**ШАРОВО́Й,** -ая, -ое **1.** шар ...ы; **шарова́я пове́рхность** шар йөҙө **2.** шар һымаҡ; **шарова́я мо́лния** шар һымаҡ йәшен (йомғағы) **3.** шарлы; **шарова́я ме́льница** шарлы тирмән

**ШАРФ** *м* шарф; **пухо́вый шарф** дебет шарф; **де́тский шарф** балалар шарфы

**ШАССИ́** *с нескл.* шасси; **шасси́ автомоби́ля** автомобиль шассийы; **убира́ющееся шасси́** йыйылмалы шасси

**ША́СТАТЬ** *несов.* **1.** *что*; *с.-х.* орлоҡ һурҙырыу; **ша́стать пшени́цу** бойҙай һурҙырыу **2.** *прост.* (*бродить, шнырять*) йөрөп ятыу, темеҫкенеп (һәптәнләп) йөрөү; **ша́стать це́лыми дня́ми** көн оҙоно темеҫкенеп йөрөү

**ШАТА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **шата́ть** 1, **шата́ться** 1—3; **2.** *перен.* (*непостоянство во взглядах, убеждениях*) аумаҡайлыҡ; **иде́йные шата́ния** идея йәһәтенән аумаҡайлыҡтар

**ШАТА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* һелкетеү, бәүелдереү, тирбәлдереү, сайҡалтыу, ҡыймылдатыу, ҡуҙғалтыу, янтайтыу; **ве́тер шата́ет ста́вни** ел тәҙрә ҡапҡастарын һелкетә; **шата́ть столб** бағананы ҡуҙғалтыу; **шата́ть зуб** теште ҡыймылдатыу **2.** *кого-что безл.* бәүелеү, сайҡалыу, алпан-толпан баҫыу, аушаңлау; **его́ шата́ет от уста́лости** ул арыуҙан алпан-толпан баҫа

**ШАТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡыймылдау, һелкенеү, бәүелеү, сайҡалыу, тирбәлеү; **зуб шата́ется** теш ҡыймылдай **2.** (*при ходьбе*) бәүелеү, тәнтерәкләү; **шата́ться от бессо́нницы** йоҡоһоҙлоҡтан тәнтерәкләү **3.** *разг.* (*бродить без дела*) ҡыҙырыу, тик йөрөү, юҡты бушҡа ауҙарыу, һәптәнләү **4.** *страд. от* **шата́ть** 1

**ШАТЕ́Н** *м* шатен, ҡуңыр сәсле ир; **шате́нка** *ж* шатенка, ҡуңыр сәсле ҡатын-ҡыҙ

**ШАТЁР** *м* сатыр; **цыга́нский шатёр** сиған сатыры; **зелёные шатры́ берёз** ҡайындарҙың йәшел сатыры

**ША́ТКИЙ,** -ая, -ое **1.** һелкенеп (сайҡалып) торған, ҡаҡшаған, ҡалҡаңлаҡ; **ша́ткие сте́ны** һелкенеп торған стеналар; **ша́ткие полови́цы** ҡалҡаңлаҡ иҙән таҡтаһы **2.** *перен.* ышанысһыҙ, нигеҙһеҙ, тотороҡһоҙ; **ша́ткие до́воды** нигеҙһеҙ дәлилдәр; **ша́ткие убежде́ния** ышанысһыҙ ҡараш ♦ **ни ша́тко ни ва́лко** *см.* **ва́лкий**

**ШАТУ́Н** *м* шатун (**1.** *тех. поршень менән валды тоташтырыусы деталь* **2.** *һунар. ҡышын йоҡоға талмай шашып (тилереп) йөрөгән айыу*)

**ШАФРА́Н** *м* **1.** зәғферән **2.** (*сорт яблони и её яблоки*) шафран

**ШАФРА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *бот.* зәғферән ...ы; **шафра́нная планта́ция** зәғферән плантацияһы **2.** зәғферәнле, зәғферән ҡушылған; **шафра́нный кули́ч** зәғферәнле күмәс **3.** (*о цвете*) зәғферән төҫлө, ҡыҙғылт һары **4.** шафран ...ы; **шафра́нное я́блоко** шафран алмаһы

**ШАФРА́НОВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **шафра́нный** 3

**ШАХ I** *м* шаһ (*титул һәм шул титулдағы кеше*)

**ШАХ II** *м*; *шахм.* шах; **объяви́ть шах** шах белдереү; **ве́чный шах** мәңге шах

**ШАХИНША́Х** *м* шаһиншаһ (*Иранда титул һәм шул титулды йөрөткән кеше*)

**ШАХИ́НЯ** *ж* шаһтың ҡатыны

**ШАХМАТИ́СТ** *м* и **ШАХМАТИ́СТКА** *ж* шахматсы, сатрашсы

**ША́ХМАТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шахмат ...ы, сатраш ...ы; **ша́хматная игра́** шахмат уйыны **2.** шахмат тәртибендә, шахмат кеүек; **ша́хматный посе́в** шахмат тәртибендә сәсеү

**ША́ХМАТЫ** *мн.* (*игра и набор фигур для неё*) шахмат, сатраш; **втора́я катего́рия по ша́хматам** шахмат буйынса икенсе категория; **расста́вить ша́хматы** шахматтарҙы теҙеп сығыу

**ША́ХСКИЙ,** -ая, -ое шаһ ...ы; **ша́хский престо́л** шаһ тәхете; **ша́хский режи́м** шаһ режимы

**ША́ХТА** *ж* шахта; **ша́хта строи́тельства метро́** метро төҙөү шахтаһы; **ша́хта ли́фта** лифт шахтаһы

**ШАХТЁР** *м* шахтёр (*шахтала эшләүсе*)

**ШАХТЁРКА** *ж* **1.** *см.* **шахтёр** **2.** (*жена шахтёра*) шахтёр ҡатыны **3.** (*рабочий костюм*) шахтёрка

**ШАХТЁРСКИЙ,** -ая, -ое шахтёр(ҙар) ...ы; **шахтёрская ла́мпа** шахтёр лампаһы

**ША́ХТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шахта ...ы; **ша́хтное обору́дование** шахта ҡорамалдары **2.** *тех.* шахталы; **ша́хтная печь** шахталы мейес ♦ **ша́хтный ствол** *горн.* шахта үҙәге (юлы)

**ША́ШЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шашка ...ы, сатраш ...ы; **ша́шечная доска́** шашка (сатраш) таҡтаһы **2.** шашка, сатраш, шашка (сатраш) тәртибендә, шашка (сатраш) кеүек; **ша́шечный узо́р** сатраш биҙәк

**ШАШИ́СТ** *м* шашкасы, сатрашсы

**ША́ШКА I** *ж* **1.** *мн.* **ша́шки** (*игра*) сатраш, шашка; **игра́ть в ша́шки** сатраш уйнау **2.** (*набор фигур к ней*) сатраш, шашка **3.** *спец.* (*кусок камня, деревянный брусок для мощения улиц*) шаҡмаҡ **4.** (*кубик взрывчатого вещества*) шашка ♦ **в ша́шку**; **ша́шкой** *в знач. нареч.* шашка формаһындағы, шашка кеүек; **дымова́я ша́шка** төтөн шашкаһы

**ША́ШКА II** *ж* (*оружие*) ҡылыс

**ШАШЛЫ́К** *м* шашлыҡ; **жа́рить шашлы́к** шашлыҡ ҡыҙҙырыу

**ШАШЛЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шашлыҡ ...ы; **шашлы́чное мя́со** шашлыҡ ите **2.** *в знач. сущ.* **шашлы́чная** *ж* шашлыҡхана

**ША́ШНИ** *только мн*; *разг.*, *неодобр.* **1.** (*козни*) мәкер-хәйлә, аҫтыртын яуызлыҡ **2.** (*любовная связь*) ғишыҡ бәйләнештәре, ғишыҡ тотоу

**ШВА́БРА** *ж* швабра; **мыть пол шва́брой** швабра менән иҙән йыуыу

**ШВАЛЬ** *ж*; *прост.* **1.** *собир.* (*негодные вещи*) яраҡһыҙ әйбер, алам-һалам **2.** (*негодный человек*) насар (хөрт, әшәке) кеше

**ШВАРТО́В** *м*; *мор.* швартов (*бәйләү арҡаны*); **отда́ть шварто́вы** швартовты ысҡындырыу

**ШВАРТОВА́ТЬ** *несов.*; *мор.* швартовкалау; **швартова́ть теплохо́д** теплоходты швартовкалау

**ШВАРТОВА́ТЬСЯ** *несов.*; *мор.* **1.** швартовкаланыу; **кора́бль шварту́ется** корабль швартовкалана **2.** *страд. от* **швартова́ть**

**ШВАРТО́ВКА** *ж*; *мор.* швартовка (*швартов менән бәйләү*)

**ШВАРТО́ВНЫЙ** и **ШВАРТО́ВЫЙ,** -ая, -ое швартов ...ы; **шварто́вые испыта́ния** швартов һынауҙары

**ШВАХ** *в знач. сказ.*; *разг.* **1.** *в чём* белмәү, мәғлүмәтһеҙ, белемһеҙ, көсһөҙ; **в поли́тике я швах** сәйәсәттә мин көсһөҙ **2.** (*плохо, скверно*) насар, хөрт, мөшкөл, яман; **дела́ у него́ швах** уның эштәре хөрт

**ШВЕ́ДСКИЙ,** -ая, -ое швед ...ы, Швеция ...ы; **шве́дский язы́к** швед теле ♦ **шве́дская му́ха** (**му́шка**) швед себене (*башаҡлы үҫемлектәр ҡоротҡосо*); **шве́дские спи́чки** швед шырпылары (*тәү башлап Швецияла эшләй башлағандар*); **шве́дская сте́нка** швед стенкаһы, гимнастика яһау стенкаһы

**ШВЕ́ДЫ** *мн.* шведтар, швед халҡы // *ед.* **швед** *м* швед ир-аты; **шве́дка** *ж* швед ҡатынҡыҙы

**ШВЕ́ЙНИК** *м* и **ШВЕ́ЙНИЦА** *ж* тегенсе, тегеүсе

**ШВЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое теген ...ы, тегеү ...ы; **шве́йная маши́на** теген машинаһы; **шве́йная промы́шленность** тегеү сәнәғәте

**ШВЕЙЦА́Р** *м* швейцар (*ишек һаҡсыһы*)

**ШВЕЙЦА́РСКИЙ I,** -ая, -ое Швейцария ...ы; **швейца́рская приро́да** Швейцария тәбиғәте

**ШВЕЙЦА́РСКИЙ II,** -ая, -ое **1.** швейцар ...ы; **швейца́рская ливре́я** швейцар ливреяһы (*кейем*) **2.** *в знач. сущ.* **швейца́рская** *ж* швейцарҙар бүлмәһе

**ШВЕЙЦА́РЦЫ** *мн.* швейцариялылар, Швейцария халҡы // *ед.* **швейца́рец** *м* Швейцария ир-аты; **швейца́рка** *ж* Швейцария ҡатын-ҡыҙы

**ШВЕ́ЛЛЕР** *м*; *тех.* швеллер (*"П" рәүешендәге ҡорос өрлөк*)

**ШВЕ́ЛЛЕРНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* швеллер ...ы, швеллер; **шве́ллерное желе́зо** швеллер тимере

**ШВЕЯ́** *ж* тегенсе, тегеүсе (*ҡатын-ҡыҙ*)

**ШВО́РЕНЬ** и **ШКВО́РЕНЬ** *м* кендек, кендексөй

**ШВЫРНУ́ТЬ** *сов. см.* **швыря́ть**

**ШВЫРО́К** *м* **1.** *разг.* (*бросок*) быраҡтырыу, ташлау, бырғау **2.** *собир.*; *спец.* (*дрова*) әрҙәнә **3.** (*предмет, употребляемый в качестве движущейся мишени при стрельбе*) швырок, сәп

**ШВЫРЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что, чем* ырғытыу, атып бәреү, быраҡтырыу, бырғытыу; **швыря́ть бума́ги в окно́** ҡағыҙҙарҙы тәҙрәнән атып бәреү **2.** *кого-что*; *перен. разг.* күсереп йөрөтөү, (унда-бында) ташлау; **куда́ то́лько судьба́ не швыря́ла** яҙмыш ҡайҙа ғына ташламаны ♦ **швыря́ть де́ньги (деньга́ми)** бушҡа аҡса туҙҙырыу, аҡса елгәреү; **швыря́ть де́ньги на ве́тер** аҡсаны елгә осороу (әрәм-шәрәм итеү)

**ШВЫРЯ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** *чем* ырғытыу, атыу, бырғытыу, ырғытышыу; **швыря́ться камня́ми** таш ырғытышыу **2.** *кем-чем*; *перен.* иҫәпләшмәү, ҡәҙерен белмәү; **нельзя́ швыря́ться друзья́ми** дуҫтар менән иҫәпләшмәйенсә ярамай **3.** *страд. от* **швыря́ть**

**ШЕВЕЛИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* ҡыймылдатыу, ҡуҙғатыу, ҡыбырлатыу, һелкетеү, сайҡалдырыу; **ве́тер шевели́т камыши́** ел ҡамыштарҙы сайҡалдыра **2.** *кого*; *перен.* ҡуҙғатыу, уятыу; **его́ на́до шевели́ть** уны ҡуҙғатырға кәрәк **3.** *чем* ҡыймылдатыу, ҡыбырлатыу; **шевели́ть губа́ми** ирендәрҙе ҡыймылдатыу **4.** *что*; *с.-х.* (*ворошить*) әйләндереү; **шевели́ть се́но** бесән әйләндереү ♦ **шевели́ть мозга́ми** башты эшләтеү, уйлап ҡарау

**ШЕВЕЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡыймылдау, ҡуҙғалыу, ҡыбырлау, һелкенеү; **ли́стья шевели́лись** япраҡтар һелкенде **2.** *перен.* ҡуҙғалыу, уяныу, йәнләнеү, ҡыбырлау; **ры́нок начина́ет шевели́ться** баҙар йәнләнә башланы **3.** *повел.* **шевели́сь (шевели́тесь)**; *разг.* ҡуҙғал(ығыҙ), ҡыймылда(ғыҙ), ҡабалан(ығыҙ) **4.** *страд. от* **шевели́ть** 1, 2, 4

**ШЕВЕЛЬНУ́ТЬ** *сов. см.* **шевели́ть** 1—3 ♦ **и (да́же) бро́вью не шевельну́ть** *см.* **бровь**; **не шевельну́ть па́льцем** ҡыл да ҡыбырлатмау, бер ни эшләмәү

**ШЕВЕЛЬНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **шевели́ться** 1, 2

**ШЕВЕЛЮ́РА** *ж* ҡуйы (ҡалын) сәс

**ШЕВИО́Т** *м* шевиот (*туҡыма*); **костю́м из шевио́та** шевиоттан тегелгән костюм

**ШЕВИО́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** шевиот, шевиот ...ы; **шевио́товое произво́дство** шевиот етештереү **2.** шевиот, шевиоттан эшләнгән (тегелгән); **шевио́товая ю́бка** шевиоттан тегелгән юбка

**ШЕВРО́** *с нескл.* шевро (*кәзә тиреһенән күн*)

**ШЕВРО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** шевро; **шевро́вая ко́жа** шевро күн **2.** шевро, шевронан эшләнгән (тегелгән); **шевро́вые боти́нки** шевро ботинка

**ШЕДЕ́ВР** *м* шедевр, гүзәл әҫәр, хазина, ҡомартҡы; **шеде́вры миров́ой литерату́ры** донъя әҙәбиәтенең гүзәл әҫәрҙәре

**ШЕЗЛО́НГ** *м* шезлонг (*торошон үҙгәртеп була торған һөҙәк арҡалы ултырғыс*)

**ШЕ́ЙКА** *ж* **1.** *уменьш.-ласк. от* **ше́я** **2.** (*узкая часть чего-л.*) муйын; **ше́йка буты́лки** шешә муйыны

**ШЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** муйын ...ы; **ше́йные позвонки́** *анат.* муйын умыртҡалары **2.** муйын ...ы, муйынға урай (бәйләй, яба) торған; **ше́йный плато́к** муйын яулығы

**ШЕЙХ** *м* шәйех (**1.** *Яҡын һәм Урта Көнсығышта аҡһаҡал, ҡәбилә башлығы* **2.** *юғары мосолман руханиҙары вәкиле*)

**ШЕ́ЛЕСТ** *м* ҡыштырлау, шыптырлау; **ше́лест ли́стьев** япраҡтар ҡыштырлауы; **ше́лест дождя́** ямғыр шыптырлауы

**ШЕЛЕСТЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*издавать шелест*) ҡыштырлау, шыптырлау; **ли́стья шелестя́т** япраҡтар шыптырлай **2.** *чем* (*производить шелест*) ҡыштырлатыу, шыптырлатыу; **шелесте́ть страни́цами кни́ги** китап биттәрен ҡыштырлатыу

**ШЁЛК** *м* **1.** *в разн. знач.* ебәк; **шёлк-сыре́ц** эшкәртелмәгән ебәк; **пла́тье из шёлка** ебәк күлдәк; **шить шёлком** ебәк менән тегеү **2.** (*о человеке с мягким характером*) ебәк, ебәк кеүек

**ШЕЛКОВИ́НА** *ж* **1.** ебәк сүсе **2.** *см.* **шелкови́нка**

**ШЕЛКОВИ́НКА** *ж* ебәк еп

**ШЕЛКОВИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ебәк һымаҡ, ебәк кеүек, ебәктәй; **шелкови́стые во́лосы** ебәк кеүек сәс

**ШЕЛКОВИ́ЦА** *ж* тут ағасы

**ШЕЛКОВИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тут ағасы ...ы; **шелкови́чные планта́ции** тут ағасы плантациялары ♦ **шелкови́чный червь** ебәк ҡорто

**ШЕЛКОВО́Д** *м* ебәксе (*ебәкселек белгесе*)

**ШЕЛКОВО́ДСТВО** *с* ебәкселек (*ебәк ҡорто үрсетеү*)

**ШЕЛКОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ебәкселек ...ы; **шелково́дческое хозя́йство** ебәкселек хужалығы

**ШЁЛКОВЫЙ** и *трад.-поэт.* **ШЕЛКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ебәк, ебәктән тегелгән (эшләнгән); **шёлковая нить** ебәк еп; **шёлковый по́яс** ебәк билбау; **шелко́вая руба́шка** ебәктән тегелгән күлдәк **2.** ебәк, ебәктәй, ебәк кеүек; **шёлковые во́лосы** ебәктәй сәстәр **3.** *перен.*, *разг.* тыңлаусан, баҫалҡы, инсафлы; **стать шёлковым** тыңлаусанға әйләнеү

**ШЁЛКОКОМБИНА́Т** *м* ебәк комбинаты

**ШЁЛКОМОТА́ЛЬНЯ** *ж* ебәк урау оҫтаханаһы

**ШЁЛКОМОТА́ЛЬЩИК** *м* ебәк ураусы

**ШЁЛКОМОТА́НИЕ** *с* ебәк урау

**ШЁЛКООБРАБА́ТЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее ебәк эшкәртеү ...ы, ебәк эшкәртеүсе; **шёлкообраба́тывающая промы́шленность** ебәк эшкәртеү сәнәғәте

**ШЕЛКОПРЯ́Д** *м* ебәк күбәләге

**ШЁЛКОПРЯДЕ́НИЕ** *с* ебәк иләү

**ШЁЛКОПРЯДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ебәк иләү ...ы; **шёлкопряди́льная фа́брика** ебәк иләү фабрикаһы

**ШЁЛКОТКА́ЦКИЙ,** -ая, -ое ебәк туҡыу ...ы; **шёлкотка́цкая фа́брика** ебәк туҡыу фабрикаһы

**ШЕЛЛА́К** *м* шеллак (*бөжәктәр бүлеп сығарған тәбиғи ыҫмала*)

**ШЕЛОХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чем* елберләтеү, ҡыштырлатыу, шыптырлатыу; **ветеро́к шелохну́л занаве́ски** ел ҡормаларҙы елберләтте **2.** *см.* **шелохну́ться** 1

**ШЕЛОХНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** елберләү, ҡыштырлау, шыптырлау, һелкенеү; **ни оди́н лист не шелохну́лся** бер япраҡ та ҡыштырламаны **2.** ҡыймылдау, ҡыбырлау; **не сметь шелохну́ться** ҡыбырларға ҡыймау

**ШЕЛУДИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *прост.* **1.** (*паршивый*) ҡутырлы, ҡысыулы, ҡорсаңғы **2.** *перен.* (*скверный*) әшәке, бик насар (алама)

**ШЕЛУХА́** *ж* **1.** ҡабыҡ; **карто́фельная шелуха́** картуф ҡабығы **2.** *перен.* кәрәкһеҙ нәмә, сүп-сар; **отсе́ивать ва́жное от шелухи́** мөһим (кәрәкле) нәмәне сүп-сарҙан таҙартыу

**ШЕЛУШЕ́НИЕ** *с см.* **шелуши́ть**, **шелуши́ться**

**ШЕЛУШИ́ТЬ** *несов. что* эрсеү, һыҙырыу, таҙартыу, ярыу; **шелуши́ть горо́х** борсаҡ таҙартыу; **шелуши́ть оре́хи** сәтләүек ярыу

**ШЕЛУШИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** төләү, ҡауаҡланыу; **лицо́ шелуши́тся** бит төләй **2.** ҡубып төшөү; **штукату́рка шелуши́лась** штукатурка ҡубып төштө **3.** *страд. от* **шелуши́ть**

**ШЕ́ЛЬМА** *м* и *ж*; *прост.* мут, хәйләкәр, шилма

**ШЕЛЬМЕ́Ц** *м*; *прост. см.* **ше́льма**

**ШЕЛЬМОВА́ТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* хурлау, яманлау, бысраҡ (яла) яғыу

**ШЕМАЯ́** *ж* (*рыба*) шамай балыҡ, майбалыҡ

**ШЕПЕЛЯ́ВИТЬ** *несов.* шышылдап һөйләү (*"с", "з" урынына "ш", "ж" өндәрен әйтеү*)

**ШЕПЕЛЯ́ВЫЙ,** -ая, -ое шышылдаҡ, шышылдап һөйләшкән; **шепеля́вая речь** шышылдаҡ телмәр; **шепеля́вый ребёнок** шышылдап һөйләшкән бала

**ШЕПНУ́ТЬ** *сов. см.* **шепта́ть**

**ШЁПОТ** *м* **1.** (*тихая речь*) бышылдау, шыбырлау **2.** *перен.* (*тихий шелест*) ҡыштырлау; (*тихое журчание*) сылтырау; (*тихий шум*) шыбырлау; **шёпот ли́стьев** япраҡтар ҡыштырлауы; **шёпот ручья́** шишмә сылтырауы **3.** *разг.* (*молва*) хәбәр, һүҙ, имеш-мимеш

**ШЁПОТОМ** *нареч.* бышылдап, быш-быш итеп; **говори́ть шёпотом** бышылдап һөйләшеү

**ШЕПТАЛА́** *ж собир.* шафталы (*киптерелгән өрөк, персик*)

**ШЕПТА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без. доп.* бышылдау, шыбырлау; **шепта́ть волше́бные слова́** тылсымлы һүҙҙәр шыбырлау **2.** *перен.* (*издавать тихий шелест*) ҡыштырлау; (*издавать тихое журчание*) сылтырау; (*издавать тихий шум*) шыбырлау; **ти́хо ше́пчет лес** урман тын ғына шыбырлай **3.** *в 3 л. мн. ч.*; *разг.* хәбәр (һүҙ, ғәйбәт, имеш-мимеш) таратыу; **ше́пчут, что бу́дет рефо́рма** реформа була тип хәбәр тараталар

**ШЕПТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бышылдашыу, быш-быш килеү, шыбырлашыу **2.** *перен.* ҡыштырлашыу, шыбырлашыу, сылтырашыу; **ше́пчутся берёзы** ҡайындар шыбырлаша **3.** хәбәр (һүҙ, ғәйбәт, имеш-мимеш) таратыу

**ШЕПТУ́Н** *м* и **ШЕПТУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* **1.** бышылдап һөйләүсе, быш-быш килеүсе **2.** ошаҡсы, ғәйбәтсе, һүҙ йөрөтөүсе

**ШЕРБЕ́Т** *м* шәрбәт

**ШЕРЕ́НГА** *ж* рәт, саф; **станови́ться в шере́нгу** рәткә теҙелеү; **дли́нная шере́нга автомаши́н** автомашиналарҙың оҙон сафы ♦ **быть (находи́ться, стоя́ть) в одно́й шере́нге** *с кем*: 1) *кем менәндер* бер эштә ҡатнашыу; 2) *кем менәндер* бер тиң хәлдә булыу

**ШЕРИ́Ф I** *м* шериф (*Ирландия, Англия, АҠШ графлыҡтарында административ һәм суд эштәре вазифаһын алып барыусы кеше*)

**ШЕРИ́Ф II** *м* (*у мусульман*) шәриф (*Мөхәммәт пәйғәмбәр нәҫеленән килгән мосолман*)

**ШЕРОХОВА́ТОСТЬ** *ж* **1.** ҡытырмаҡ, ҡытыршылыҡ, суғырмаҡлыҡ; **шерохова́тость доски́** таҡтаның ҡытыршылығы; **шерохова́тость ко́жи** күндең ҡытыршылығы **2.** *перен.* (*в речи, стиле и т.п.*) ҡытыршылыҡ, етешһеҙлек; **шерохова́тость сти́ля** стиль ҡытыршылығы; **шерохова́тость стихо́в в перево́де** тәржемә ителгән шиғырҙарҙың етешһеҙлеге **3.** *мн.* **шерохова́тости**; *перен.* (*неприятности*) аңлашылмаусылыҡтар, күңелһеҙлектәр, уңайһыҙлыҡтар; **жите́йские шерохова́тости** тормоштағы уңайһыҙлыҡтар

**ШЕРОХОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡытыршы, ҡытырмаҡлы, суғырмаҡлы; **шерохова́тый ствол** суғырмаҡлы олон **2.** *перен.* ҡытыршы, етешһеҙ, килешһеҙ; **шерохова́тая фра́за** ҡытыршы фраза

**ШЕРСТЕОБРАБА́ТЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее йөн эшкәртеү ...ы; **шерстеобраба́тывающее предприя́тие** йөн эшкәртеү предприятиеһы

**ШЕРСТИ́НКА** *ж* **1.** (*волосок шерсти*) төк **2.** (*шерстяная нить*) йөн еп; (*ворсинка*) өбөрө

**ШЕРСТИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** йөнтәҫ, ҡуйы (ҡалын) йөнлө; **шерсти́стые о́вцы** ҡуйы йөнлө һарыҡтар **2.** *см.* **ворси́стый**

**ШЕРСТИ́ТЬ** *несов. что* и *без доп.* **1.** ҡысыттырыу, ҡырыу, өйкәү; **пла́тье шерсти́т** күлдәк тәнде ҡысыттыра **2.** *перен.*, *прост.* (*привести в беспорядок*) аҫтын-өҫкә әйләндереү, туҙҙырыу **3.** *разг.*



21 зак. 2.0007.06

ҡаты әрләү, ҡыҙҙырыу; **шерсти́ть неради́вых** ялҡауҙарҙы ҡыҙҙырыу

**ШЁРСТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йөн ...ы; **шёрстная проду́кция** йөн продукцияһы **2.** *с.-х.* йөнлө, йөндө күп бирә торған; **шёрстная овца́** йөндө күп бирә торған һарыҡ

**ШЕРСТОБИ́Т** *м* йөн тетеүсе (*оҫта*)

**ШЕРСТОБИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое йөн тетеү ...ы, йөн тетә торған; **шерстоби́тный про́мысел** йөн тетеү кәсебе

**ШЕРСТОБО́ЙНЯ** *ж* йөн тетеү урыны

**ШЕРСТОМО́ЙКА** *ж* йөн йыуғыс машина

**ШЕРСТОПРЯДЕ́НИЕ** *с* йөн иләү

**ШЕРСТОПРЯДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йөн иләү ...ы; **шерстопряди́льная фа́брика** йөн иләү фабрикаһы

**ШЕРСТОПРЯДИ́ЛЬНЯ** *ж* йөн иләү оҫтаханаһы

**ШЕРСТОТКА́ЦКИЙ,** -ая, -ое йөн туҡыу ...ы; **шерстотка́цкая фа́брика** йөн туҡыу фабрикаһы

**ШЕРСТОТКА́ЧЕСТВО** *с* йөн туҡыу

**ШЕРСТОЧЕСА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йөн тетеү ...ы; **шерсточеса́льная маши́на** йөн тетеү машинаһы

**ШЕРСТЬ** *ж* **1.** (*у животных*) йөн; (*у овец, лошадей и коров при весенней линьке*) баҡта; (*у жеребят при весенней линьке*) ябаға; **ове́чья шерсть** һарыҡ йөнө; **обрабо́тка ше́рсти** йөн эшкәртеү **2.** (*пряжа*) иләнгән йөн, йөн еп **3.** (*ткань*) йөн туҡыма

**ШЕРСТЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** йөн; **шерстяна́я ткань** йөн туҡыма **2.** йөн ...ы, йөн эшкәртеү ...ы; **шерстяна́я фа́брика** йөн эшкәртеү фабрикаһы **3.** йөн, йөндән эшләнгән; **шерстяно́е пла́тье** йөн күлдәк

**ШЕРША́ВЕТЬ** *несов.* (*о коже*) ярылыу, шырауланыу, ҡытыршыланыу; **у него́ ру́ки шерша́веют** уның ҡулдары шыраулана

**ШЕРША́ВОСТЬ** *ж* ярылғанлыҡ, шыраулanғанлыҡ, ҡытыршылыҡ

**ШЕРША́ВЫЙ,** -ая, -ое ярылған, шыраулаңған, ҡытыршы; **шерша́вые ру́ки** шыраулаңған ҡулдар

**ШЕ́РШЕНЬ** *м* траш (*ҡараһыу һары эре бөжәк; һағыҙаҡтар ғаиләһенә ҡарай*)

**ШЕСТ** *м* ҡолға, һайғау; **прыжо́к с шесто́м** *спорт.* ҡолға менән һикереү

**ШЕ́СТВИЕ** *с* **1.** тантаналы йөрөш, атлау; **пра́здничное ше́ствие** байрамса тантаналы йөрөш **2.** (*процессия*) халыҡ ағымы, халыҡ төркөмө; **ше́ствие тро́нулось** халыҡ ағымы ҡуҙғалды **3.** *чего; перен.* үҫеш, алға китеш; **триумфа́льное ше́ствие демокра́тии** демократияның триумфаль үҫеше

**ШЕ́СТВОВАТЬ** *несов.* **1.** тантаналы йөрөү (барыу), байрамса йөрөү; **ше́ствовать по у́лицам** урамдар буйлап тантаналы йөрөү **2.** *шутл., ирон.* эре генә атлап барыу

**ШЕСТЕРЁНКА** *ж см.* **шестерня́**

**ШЕСТЁРКА** *ж* **1.** (*цифра*) алты **2.** *разг.* (*номер трамвая, автобуса*) алтынсы **3.** (*группа из шести единиц*) алты, алтау **4.** *карт.* алтылыҡ **5.** (*упряжка из шести лошадей*) сыбата егелгән алты ат **6.** (*шестивесельная лодка*) алты ишкәкле кәмә

**ШЕСТЕРНЯ́** *ж*; *тех.* тешле тәгәрмәс, шестерня

**ШЕ́СТЕРО** *числ. собир.* алтау, алты; **ше́стеро сынове́й** алты ул; **их бы́ло ше́стеро** улар алтау ине

**ШЕСТИ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "алты" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **шестигра́нный** алты ҡырлы; **шестиэта́жный** алты ҡатлы

**ШЕСТИГРА́ННИК** *м*; *мат.* алтыҡыр (*геометрик есем*)

**ШЕСТИГРА́ННЫЙ,** -ая, -ое *мат.* алты ҡырлы; **шестигра́нная фигу́ра** алты ҡырлы фигура

**ШЕСТИДЕСЯТИЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) алтмыш йыл **2.** (*годовщина*) алтмыш йыллыҡ, алтмыш йәшлек

**ШЕСТИДЕСЯТИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) алтмыш йыллыҡ **2.** (*о возрасте*) алтмыштағы, алтмыш йәшлек **3.** (*о годовщине*) алтмыш йәшлек, алтмыш йыллыҡ; **шестидесятиле́тний юбиле́й** алтмыш йәшлек юбилей

**ШЕСТИДЕСЯ́ТНИК** *м* алтмышынсы йылдар эшмәкәре

**ШЕСТИДЕСЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* алтмышынсы; **шестидеся́тый но́мер** алтмышынсы номер; **шестидеся́тые го́ды** алтмышынсы йылдар

**ШЕСТИДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое алты көн, алты көнлөк, алты көнгә иҫәпләнгән; **шестидне́вный путь** алты көнлөк юл; **шестидне́вный запа́с продово́льствия** алты көнлөк аҙыҡ һаҡламы

**ШЕСТИКЛА́ССНИК** *м* и **ШЕСТИКЛА́ССНИЦА** *ж* алтынсы синыф уҡыусыһы, алтынсы синыфта уҡыусы

**ШЕСТИКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** алты ҡабат, алты тапҡыр (мәртәбә); **шестикра́тный чемпио́н** алты тапҡыр чемпион **2.** алты тапҡыр арттырылған; **в шестикра́тном разме́ре** алты тапҡыр арттырылған күләмдә

**ШЕСТИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) алты йыллыҡ, алты йыл; **шестиле́тнее отсу́тствие** алты йыл булмау **2.** (*о возрасте*) алты йәшлек, алтылағы; **шестиле́тний ма́льчик** алты йәшлек малай

**ШЕСТИНЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое алты аҙналыҡ; **шестинеде́льный о́тпуск** алты аҙналыҡ отпуск

**ШЕСТИПА́ЛЫЙ,** -ая, -ое алты бармаҡлы

**ШЕСТИСОТЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) алты йөҙ йыл, алты быуат **2.** (*годовщина*) алты йөҙ йыллыҡ, алты быуатлыҡ; **шестисотле́тие го́рода** ҡаланың алты йөҙ йыллығы

**ШЕСТИСОТЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее 1. (*о возрасте*) алты йөҙ йәшлек; **шестисотле́тние ли́ственницы** алты йөҙ йәшлек ҡарағастар **2.** (*о годовщине*) алты йөҙ йыллыҡ, алты быуатлыҡ; **шестисотле́тний юбиле́й** алты йөҙ йыллыҡ юбилей

**ШЕСТИСО́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* алты йөҙөнсө; **шестисо́тый но́мер** алты йөҙөнсө номер

**ШЕСТИУГО́ЛЬНИК** *м*; *мат.* алтымөйөш

**ШЕСТИУГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое алты мөйөшлө; **шестиуго́льная ба́шня** алты мөйөшлө башня

**ШЕСТИЧАСОВО́Й,** -ая, -ое **1.** алты сәғәтлек, алты сәғәтле; **шестичасово́й рабо́чий день** алты сәғәтлек эш көнө **2.** сәғәт алтылағы; **шестичасово́й по́езд** сәғәт алтылағы поезд

**ШЕСТИЭТА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое алты ҡатлы; **шестиэта́жный дом** алты ҡатлы йорт

**ШЕСТНАДЦАТИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) ун алты йыллыҡ **2.** (*о возрасте*) ун алты йәшлек; **шестнадцатиле́тний па́рень** ун алты йәшлек егет

**ШЕСТНА́ДЦАТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* ун алтынсы; **тебе́ шестна́дцатый год** һиңә ун алтынсы йәш

**ШЕСТНА́ДЦАТЬ** *числ.* ун алты

**ШЕСТО́Й** *числ.* **1.** алтынсы; **шеста́я в о́череди** сиратта алтынсы; **де́вочке шесто́й год** ҡыҙға алтынсы йәш **2.** *в знач. сущ.* **шеста́я** *ж* алтынан бер (өлөш) ♦ **шесто́е чу́вство** нык үҫешкән һиҙгерлек

**ШЕСТО́К** *м* **1.** (*в печи*) көлдөксә **2.** төнәк, ҡуналҡа (*тауыҡ һ.б. өсөн*)

**ШЕСТЬ** *числ.* алты; **шесть рубле́й** алты һум

**ШЕСТЬДЕСЯ́Т** *числ.* алтмыш; **шестьдеся́т киломе́тров** алтмыш километр

**ШЕСТЬСО́Т** *числ.* алты йөҙ; **шестьсо́т рубле́й** алты йөҙ һум

**ШЕ́СТЬЮ** *нареч.* алты, алты ерҙә, алты тапҡыр, алты мәртәбә; **ше́стью шесть — три́дцать шесть** алты алтың утыҙ алты

**ШЕФ** *м* **1.** (*начальник*) шеф, башлыҡ **2.** (*обычно в приложении*) шеф; **шеф-пило́т** шеф-осоусы **3.** (*куратор, покровитель*) шеф, шефлыҡ итеүсе; **ше́фы шко́лы** мәктәп шефтары

**ШЕ́ФСКИЙ,** -ая, -ое шеф ...ы, шефлыҡ ...ы; **ше́фская по́мощь** шефлыҡ ярҙамы; **ше́фские обя́занности** шеф бурыстары

**ШЕ́ФСТВО** *с* шефлыҡ, шефлыҡ итеү; **взять ше́фство** шефлыҡҡа алыу

**ШЕ́ФСТВОВАТЬ** *несов.* шеф булыу, шефлыҡ итеү, шефҡа алыу; **ше́фствовать над се́льской молодёжью** ауыл йәштәренә шефлыҡ итеү

**ШЕ́Я** *ж* муйын, үңәс ♦ **гнуть ше́ю** *перед кем* бил бөгөү, буйһоноу; **нанома́ть (намя́ть и т.п.) ше́ю** *кому*; *прост.* туҡмау; **ве́шаться (кида́ться, броса́ться) на ше́ю** *кому* муйынға аҫылыныу; **посади́ть на ше́ю** *кому* өҫтөңә алыу, елкәгә ултыртыу; **сесть на ше́ю** *кому* кеше иҫәбенә йәшәү

**ШИ́БЕР** *м*; *тех.* шибер (*завод мейесенең төтөн юлындағы ҡапҡасы*)

**ШИ́БКИЙ,** -ая, -ое *прост.* (*быстрый*) йылдам, тиҙ, шәп, йәһәт, етеҙ; **ши́бкая езда́** тиҙ йөрөү

**ШИ́БКО** *нареч.*; *прост.* **1.** (*быстро*) йылдам, тиҙ, шәп, йәһәт, етеҙ **2.** (*сильно, очень*) көслө, үтә, бик нык; **испуга́ться ши́бко** бик нык ҡурҡыу

**ШИ́ВОРОТ: за ши́ворот** яғаһынан алыу; **ши́ворот-навы́ворот**: 1) алдын артҡа, киреһенсә, тиҫкәреһенә; 2) тейешенсә түгел

**ШИЗОФРЕ́НИК** *м*; *разг.* шизофреник (*шизофрения менән ауырыусы*)

**ШИЗОФРЕНИ́Я** *ж*; *мед.* шизофрения (*психик ауырыу*)

**ШИИ́ЗМ** *м* (*одно из главных направлений ислама*) шиғисылыҡ

**ШИИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **шии́т** *м*) шиғисылар

**ШИК** *м* ҡупшы, ҡупшылыҡ, фырт, фыртлыҡ; **е́здить с ши́ком** фырт йөрөү; **оде́ться с ши́ком** ҡупшы кейенеү

**ШИ́КАНЬЕ** *с см.* **ши́кать**

**ШИКА́РНО** **1.** *нареч.* бик шәп, үтә ҡупшы, фырт; **шика́рно обста́вить кварти́ру** фатирҙы бик шәп итеп йыһазлау **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* бик һәйбәт, бик шәп, бына тигән; **у сосе́дей шика́рно** күршеләрҙә бик шәп

**ШИКА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үтә ҡупшы, фырт, бай, төҙөк; **шика́рная кварти́ра** бай фатир; **шика́рные кварта́лы** төҙөк кварталдар **2.** (*превосходный*) бик шәп, үтә һәйбәт; **шика́рная кни́га** бик шәп китап

**ШИ́КАТЬ** *несов.* **1.** *на кого* (*пугая птиц, животных*) "көш" тип ҡурҡытыу (ҡыуыу) **2.** *на кого* (*призывать к тишине*) "шш" ("тшш", "тсс") тип әйтеү **3.** (*выражать неодобрение*) мәсхәрәләп ҡысҡырыу (һыҙғырыу)

**ШИ́КНУТЬ** *сов. см.* **ши́кать**

**ШИ́ЛЛИНГ** *м* шиллинг (*Англияла аҡса берәмеге*)

**ШИ́ЛО** *с* беҙ; **проколо́ть ши́лом** беҙ менән тишеү ♦ **ши́ла в мешке́ не утаи́шь** беҙ ҡапсыҡта ятмай

**ШИМПАНЗЕ́** *м нескл.* шимпанзе (*кеше һымаҡ маймыл*)

**ШИ́НА** *ж* **1.** шин; **автомоби́льная ши́на** автомобиль шины **2.** *мед.* талыҡ, өйсөк, шин

**ШИНЕ́ЛЬ** *ж* шинель; **солда́тская шине́ль** һалдат шинеле

**ШИНЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шинель ...ы; **шине́льный воротни́к** шинель яғаһы **2.** шинеллек, шинель өсөн тәғәйенләнгән; **шине́льное сукно́** шинеллек туҡыма **3.** *в знач. сущ.* **шине́льная** *ж* бүлмә (*шинель һәм баш кейемдәрен сисә торған*)

**ШИНКА́РСТВО** *с* мәйханасылыҡ (*эскелек әҙерләү һәм һатыу эше*)

**ШИНКА́РЬ** *м* ҡабаҡ хужаһы, мәйханасы

**ШИНКОВА́ТЬ** *несов. что* ваҡлап ҡырҡыу, турау; **шинкова́ть капу́сту** кәбеҫтә турау

**ШИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** шин ...ы; **ши́нное произво́дство** шин етештереү **2.** шин ...ы, шин өсөн тәғәйенләнгән; **ши́нное желе́зо** шин тимере

**ШИНО́К** *м* ҡабаҡ, мәйхана

**ШИНШИ́ЛЛА** *ж* шиншилла (**1.** *Көньяҡ Америкала йәшәгән тейен һымаҡ кимереүсе йәнлек һәм шуның ҡиммәтле тиреһе* **2.** *куҙелйем һоро тиреле кролик тоҡомо*)

**ШИНЬО́Н** *м* шиньон, яһалма сәс

**ШИП** *м* **1.** (*у растения*) энә, сәнскәк; (*у рыб*) ҡылсыҡ **2.** сөй, тырнаҡ; **подко́ва с шипа́ми** сөй-

лө даға; **боти́нки с шипа́ми** тырнаҡлы ботинка **3.** (*выступ на деревянной детали*) сығынты

**ШИПЕ́НИЕ** *с см.* **шипе́ть**

**ШИПЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*о гусях, змеях*) ыҫылдау, ышылдау; (*о сырых дровах при горении*) быҫҡыу, быҫҡып яныу; (*о масле на сковороде*) шыжлау, сыжылдау; (*о пенящейся жидкости*) ғызлау, бызырлау, сымырлау **2.** (*призывать к тишине*) “шш” (“тшш”, “тсс”) тип тыйыу **3.** *разг.* (*выражать недовольство*) мығырлау, сөңкөлдәү, ышылдау

**ШИПО́ВНИК** *м* (*растение и плод*) гөлйемеш, әлморон

**ШИПУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** (*пенящийся — о напитках*) шыжылдап (шыжлап, ғызлап) торған **2.** *в знач. сущ.* **шипу́чее** *с см.* **шипу́чка**

**ШИПУ́ЧКА** *ж*; *разг.* ғызлап торған эсемлек

**ШИПЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **шипе́ть** **2.** *прил.* ышылдаған, шышылдаған; **шипя́щий го́лос** шышылдаған тауыш ♦ **шипя́щие согла́сные** *лингв.* шышылдаулы тартынҡылар

**ШИРИНА́** *ж* **1.** киңлек, иң, ҡалынлыҡ; **кана́ва шириной в два шага́** ике аҙым киңлегендәге канау; **ширина́ тка́ни** туҡыма иңе; **шириной в па́лец** бармаҡ ҡалынлығында **2.** *см.* **широта́** 1

**ШИРИ́НКА** *ж* шәлтәү

**ШИ́РИТЬ** *несов. что*; *прям.*, *перен.* киңәйтеү, йәйелдереү, ҙурайтыу; **ши́рить глаза́** күҙҙәрҙе ҙурайтыу; **ши́рить движе́ние за мир** тыныслыҡ хәрәкәтен йәйелдереү

**ШИ́РМА** *ж* **1.** ширма (*йыйып күсермәле шаршау*); **поста́вить ши́рму пе́ред крова́тью** карауат алдына ширма ҡуйыу **2.** *перен.* пәрҙә (*ышыҡ булып йөрөгән кеше*); **служи́ть ши́рмой** пәрҙә булып йөрөү (хеҙмәт итеү)

**ШИРО́КИЙ,** -ая, -ое **1.** киң, яҫы, иңле; **широ́кая у́лица** киң урам; **широ́кая ле́нта** яҫы таҫма; **широ́кая мате́рия** иңле туҡыма **2.** мул, иркен, киң; **широ́кие шарова́ры** киң салбар **3.** киң, икһеҙ-сикһеҙ, йәйрәп ятҡан; **широ́кие луга́** киң болондар; **широ́кие да́ли** йәйрәп ятҡан алыҫлыҡ **4.** *перен.* ҙур, киң; **широ́кие масшта́бы** киң масштабтар; **широ́кие пла́ны** ҙур пландар **5.** *перен.* киң; **широ́кие слои́ населе́ния** киң ҡатлам халыҡ; **това́ры широ́кого потребле́ния** киң ҡулланыу тауарҙары ♦ **широ́кий экра́н** киң экран; **широ́ким фро́нтом** бөтә ерҙә лә, киң йәйелгән, иңләп, киң ҡолас менән, күмәкләшеп; **на широ́кую ру́ку (но́гу)** мул, иркен (*йәшәү*); **сде́лать широ́кий жест** киң күңеллелек күрһәтеп нимәлер вәғәҙә итеү; **держи́ карма́н ши́ре!** *см.* **держа́ть**

**ШИРОКО́** и **ШИРО́КО** *нареч. от* **широ́кий** 1, 3—5; **широко́ улыбну́ться** асыҡ йылмайыу; **жить широко́** мул йәшәү

**ШИРОКО...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең “киң”, “яҫы” мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **широкогру́дый** киң күкрәкле; **широколи́цый** яҫы битле

**ШИРОКОВЕЩА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тапшырыу мөмкинлеге киң (ҙур) булған; **широковеща́тельная радиоста́нция** тапшырыу мөмкинлеге киң булған радиостанция **2.** *ирон.* күпте вәғәҙә иткән, тау-тау, шау-шыулы; **широковеща́тельные обеща́ния** тау-тау вәғәҙәләр

**ШИРОКОКОЛЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое киң колеялы (ыҙанлы); **ширококоле́йная желе́зная доро́га** киң колеялы тимер юл

**ШИРОКОКРЫ́ЛЫЙ,** -ая, -ое киң ҡанатлы (ҡоласлы); **ширококры́лые пти́цы** киң ҡанатлы ҡоштар

**ШИРОКОЛИ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*лиственный*) япраҡлы; **широколи́ственные дере́вья** япраҡлы ағастар **2.** ҡуйы япраҡлы; **широколи́ственный клён** ҡуйы япраҡлы саған

**ШИРОКОЛИ́СТНЫЙ** и **ШИРОКОЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое киң япраҡлы; **широколи́стые цветы́** киң япраҡлы сәскәләр

**ШИРОКОПЛЕ́ЧИЙ,** -ая, -ее киң яурынлы

**ШИРОКОПО́ЛЫЙ,** -ая, -ое киң ситле, киң тирәсле; **широкопо́лая шля́па** киң тирәсле эшләпә

**ШИРОКОРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* рәт араһы киң; **широкоря́дный посе́в** рәт араһы киң сәсеүлек

**ШИРОКОЭКРА́ННЫЙ,** -ая, -ое киң экранлы; **широкоэкра́нный кинотеа́тр** киң экранлы кинотеатр

**ШИРОТА́** *ж* **1.** киңлек, иркенлек, ҙурлыҡ, күплек, сикһеҙлек; **широта́ воззре́ний** ҡараштар киңлеге; **широта́ интере́сов** ҡыҙыҡһыныуҙар күплеге; **широта́ образова́ния** белем киңлеге **2.** *см.* **ширина́** 1; **3.** *геогр.* киңлек; **ю́жные широ́ты** көньяҡ киңлектәр

**ШИРО́ТНЫЙ,** -ая, -ое киңлек ...ы, киңлеккә ...ы; **широ́тная протяжённость страны́** илдең киңлеккә һуҙымы

**ШИРПОТРЕ́Б** *м*; *разг.* **1.** киң ҡулланыу; **произво́дство предме́тов ширпотре́ба** киң ҡулланыу әйберҙәрен етештереү **2.** *собир.* киң ҡулланыу тауарҙары; **цех ширпотре́ба** киң ҡулланыу тауарҙары цехы

**ШИРЬ** *ж* **1.** киңлек, иркенлек; **степна́я ширь** дала киңлеге **2.** *разг. см.* **ширина́** 1 ♦ **во всю ширь (разверну́ться, разви́ться и т.п.)** киң ҡолас алыу (йәйеү)

**ШИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **шить** **2.** *прил.* (*вышитый*) сигелгән, сигеүле; **ши́тое полоте́нце** сигеүле таҫтамал

**ШИТЬ** *несов.* **1.** тегеү, тектереү; **шить на маши́нке** машинка менән тегеү; **шить пла́тье** күлдәк тегеү; **шить сапоги́** итек тегеү **2.** *чем, по чему* (*вышивать*) сигеү; **шить шёлком** ебәк менән сигеү ♦ **ши́то и кры́то**; **ши́то-кры́то** эҙе-юлы юҡ, билдәһеҙ; **бе́лыми ни́тками ши́то** ямауы тыштан һалынған (*хилафлығы күренеп торған, килешһеҙ эш-хәл тураһында*); **не лы́ком шит** *см.* **лы́ко**

**ШИТЬЁ** *с* **1.** *см.* **шить**; **ку́рсы кро́йки и шитья́** бесергә һәм тегергә өйрәтеү курстары **2.** тегелгән (сигелгән) әйбер, тегелә (сигелә) торған әйбер; **не-**

**зако́нченное шитьё** тегелеп бөтмәгән әйбер **3.** (*вышитый узор*) сигеү, сигелгән биҙәк, сигеүле буй сепрәк; **золото́е шитьё** алтын менән сигелгән биҙәк **4.** *собир.* (*вышитые изделия*) сигеүле әйберҙәр

**ШИ́ФЕР** *м* шифер; **крыть дом ши́фером** өй ҡыйыҡын шифер менән ябыу

**ШИ́ФЕРНЫЙ,** -ая, -ое шифер; **ши́ферная кро́вля** шифер түбә

**ШИФО́Н** *м* шифон (*туҡыма*)

**ШИФО́НОВЫЙ,** -ая, -ое шифон ...ы, шифон, шифондан тегелгән; **шифо́новая косы́нка** шифон косынка

**ШИФОНЬЕ́Р** *м* шифоньер; **пове́сить пла́тье в шифонье́р** күлдәкте шифоньерға элеү

**ШИФР** *м* **1.** (*условная азбука*) шифр; **испо́льзовать но́вый шифр** яңы шифр ҡулланыу **2.** (*библиотечный*) билдә, шифр

**ШИФРОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое шифровкалау ...ы, шифр ...ы; **шифрова́льный отде́л** шифровкалау бүлеге

**ШИФРОВА́ЛЬЩИК** *м* шифровкалаусы, шифрлаусы

**ШИФРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **шифрова́ть 2.** *прил.* шифрлы, шифр менән яҙылған; **шифро́ванное письмо́** шифрлы хат

**ШИФРОВА́ТЬ** *несов. что* шифр менән яҙыу, шифрлау

**ШИФРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **шифрова́ть 2.** *разг.* (*текст*) шифрлы яҙыу

**ШИ́ХТА** *ж*; *тех.* шихта (*эшкәртеү өсөн әҙерләнгән мәғдән, металл, күмер һ.б. ҡатнашмаһы*)

**ШИШ** *м* **1.** *прост. см.* **ку́киш 2.** *прост.* (*ничто*) бер нәмә лә, бер ни ҙә ♦ **шиш с ма́слом получи́ть (дать)** *груб., прост.* бер нәмә лә алмау (бирмәү); **на каки́е шиши́ (жить, покупа́ть, приобрета́ть и т.п.)** *груб., прост.* ниндәй аҡсаға (йәшәргә, һатып алырға, алырға һ.б.); **ни шиша́ (нет, не име́ется и т.п.)** *груб., прост.* юҡ, бер ни ҙә, бер нәмә лә

**ШИША́К** *м*; *ист.* шишак (*металдан яһалған осло хәрби шлем*)

**ШИ́ШКА** *ж* **1.** шеш, шешек, оро; **наби́ть себе́ ши́шку на лбу** маңлайға оро сығарыу **2.** *бот.* тубырсыҡ; **ело́вая ши́шка** шыршы тубырсығы **3.** *прост.* (*о влиятельном человеке*) йоғонтоло кеше, түрә; **э́то кру́пная ши́шка** был ҙур түрә ♦ **все ши́шки ва́лятся** *на кого кемдеңдер* башына бөтә туҡмаҡтар төшә

**ШИШКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое тигеҙ булмаған, тигеҙһеҙ, ҡытыршы, күбеп (ҡабарып) торған, суғырмаҡлы, суғырмаҡланған; **шишкова́тая пове́рхность** тигеҙ булмаған йөҙ; **шишкова́тый лоб** суғырмаҡлы маңлай

**ШИШКОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое шешек һымаҡ, оро һымаҡ; **шишкови́дная железа́** *анат.* шешек һымаҡ биҙ

**ШКАЛА́** *ж*; *в разн. знач.* шкала; **шкала́ термо́метра** термометр шкалаһы; **шкала́ обложе́ния нало́гом** һалым һалыу шкалаһы

**ШКА́НЦЫ** *мн.*; *мор.* шканцы (*караптарҙа рәсми осрашыуҙар, парадтар үткәреү урыны*)

**ШКАТУ́ЛКА** *ж* ҡумта, шкатулка

**ШКАФ** *м* шкаф; **кни́жный шкаф** китап шкафы; **суши́льный шкаф** киптереү шкафы

**ШКВАЛ** *м* **1.** шквал, көслө дауыллы ел, өйөрмә **2.** *чего, какой*; *перен.* шквал, ҡойон, өйөрмә (*көслө атыш*); **шквал огня́** ут өйөрмәһе; **артиллери́йский шквал** туп ҡойоно

**ШКВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дауыллы, өйөрмәле; **шква́льный ве́тер** дауыллы ел **2.** *перен.* көслө, дәһшәтле; **шква́льный ого́нь пулемётчиков** пулемётсыларҙың көслө уты; **шква́льный обстре́л** дәһшәтле атыш

**ШКВА́РКИ** *мн.* (*ед.* **шква́рка** *ж*) һыҙлыҡ (*иреткән туң майҙан ҡалған*)

**ШКИВ** *м*; *тех.* шкив (*көс тапшырыу ҡайышын хәрәкәткә килтерә торған тәгәрмәс*)

**ШКИ́ПЕР** *м*; *мор.* шкипер (**1.** *тағылмалы йылға суднолары командиры* **2.** *караптың мөлкәте өсөн яуаплы кеше*)

**ШКО́ЛА** *ж* **1.** *в разн. знач.* мәктәп; **нача́льная шко́ла** башланғыс мәктәп; **музыка́льная шко́ла** музыка мәктәбе; **шко́ла жи́зни** тормош мәктәбе **2.** (*направление в науке, искусстве*) мәктәп, йүнәлеш; **но́вая шко́ла исто́риков** тарихсыларҙың яңы мәктәбе ♦ **вы́сшая шко́ла** юғары уҡыу йорто

**ШКО́ЛА-ИНТЕРНА́Т** *ж* мәктәп-интернат; **откры́ть шко́лу-интерна́т** мәктәп-интернат асыу

**ШКО́ЛЬНИК** *м* и **ШКО́ЛЬНИЦА** *ж* уҡыусы

**ШКО́ЛЬНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое уҡыусыға хас, уҡыусыларса; **шко́льнические проде́лки** мәктәп балаһына хас шуҡлыҡтар

**ШКО́ЛЬНИЧЕСТВО** *с* уҡыусы кеүек тотоу, шаянлыҡ, шуҡлыҡ, уҡыусы ҡылығы

**ШКО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәктәп ...ы, мәктәптәге; **шко́льный коллекти́в** мәктәп коллективы; **шко́льные принадле́жности** мәктәп кәрәк-яраҡтары; **шко́льный во́зраст** мәктәп йәше; **шко́льная дру́жба** мәктәп дуҫлығы **2.** *см.* **шко́льнический**; **шко́льные вы́ходки** мәктәп балаһына хас шаянлыҡтар

**ШКОТ** *м*; *мор.* шкот (*елкән менән идара итеү кәрәк-яраҡтары*)

**ШКУ́РА** *ж* **1.** тире; **медве́жья шку́ра** айыу тиреһе **2.** *перен., прост.* тормош, баш, йән; **забо́титься о свое́й шку́ре** үҙ тормошоң хаҡында ҡайғыртыу; **испыта́ть на свое́й шку́ре** үҙ башыңдан кисереү; **спаса́ть свою́ шку́ру** үҙ башыңды һаҡлау ♦ **быть (очути́ться) в шку́ре** *чьей-л.* икенсе бер кеше хәленә төшөү; **волк в ове́чьей шку́ре** *см.* **волк**; **дели́ть шку́ру неуби́того медве́дя** *см.* **дели́ть**; **драть шку́ру** *см.* **драть**

**ШКУ́РКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **шку́ра** 1; **2.** *разг.* (*кожура*) ҡабыҡ; **шку́рка от апельси́на** апельсин ҡабығы **3.** *спец.* ҡағыҙ; **нажда́чная шку́рка** наждак ҡағыҙы

**ШКУ́РНИК** *м*; *разг.* шкурник, үҙ файҙаһын ғына күҙәтеүсе, үҙен генә ҡайғыртыусы

**ШКУ́РНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* үҙ файҙаһын ғына күҙәтеүсегә хас, үҙен генә ҡайғыртыусыға хас; **шку́рнические зама́шки** үҙ файҙаһын ғына күҙәтеүсегә хас ҡылыҡ

**ШКУ́РНИЧЕСТВО** *с*; *разг.* үҙ файҙаһын ғына ҡайғыртыу, үҙен генә ҡайғыртыу

**ШЛАГБА́УМ** *м* шлагбаум, күтәрмә кәртә

**ШЛАК** *м* шлак; **у́гольный шлак** күмер шлагы

**ШЛАКОБЕТО́Н** *м* шлакобетон, шлаклы бетон; **строи́тельный шлакобето́н** төҙөлөш шлаклы бетоны

**ШЛАКОБЛО́К** *м* шлакоблок, шлаклы блок

**ШЛАМ** *м*; *спец.* шлам; **очи́стить котёл от шла́ма** ҡаҙанды шламдан таҙартыу

**ШЛАНГ** *м* шланг; **рези́новый шланг** резина шланг

**ШЛЕЙФ** *м* **1.** шлейф (*ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең арттан һөйрәлгән итәге*) **2.** *с.-х.* һөйрәтке

**ШЛЕМ** *м* **1.** *ист.* торҡа **2.** шлем (*осоусылар, танкистар һ.б. өсөн махсус тегелгән баш кейеме*)

**ШЛЕМОФО́Н** *м*; *спец.* шлемофон (*аппаратуралы баш кейеме*)

**ШЛЁНКА** *ж* шлёнка (*нәҙек йөнлө һарыҡ тоҡомо һәм шул һарыҡтың йөнө*)

**ШЛЁП** *межд. разг.* **1.** шап итеү, шап-шап (шапылдата) һуғыу **2.** *в знач. сказ.* шап итеү, шап итеп барып төшөү (йығылыу); **шлёп в грязь** батҡаҡҡа шап итеп барып төшөү

**ШЛЁПАНЦЫ** *мн.* (*ед.* **шлёпанец** *м*); *разг.* шипатай

**ШЛЁПАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что, по чему* шапылдатыу, сапылдатыу, шап (сап) итеп һуғыу **2.** *чем* шап-шоп һуғыу (баҫып йөрөү); **шлёпать ту́флями** туфли менән шап-шоп баҫып йөрөү **3.** *разг. см.* **шлёпаться**; **шлёпают во́лны о бе́рег** тулҡындар шап-шоп ярға бәреләә **4.** *прост.* (*идти*) шапылдау, шаптыр-шоптор баҫыу; **шлёпать по гря́зной доро́ге** бысраҡ юлдан шапылдап барыу

**ШЛЁПАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* шап итеү, шап-шоп бәрелеү (һуғылыу), шап итеп йығылыу (төшөү, бәрелеү); **шлёпаться в во́ду** һыуға шап итеп барып төшөү

**ШЛЁПНУТЬ** *сов.* **1.** *см.* **шлёпать** 1, 3; **2.** *кого*; *прост.* (*убить*) атып үлтереү (йығыу)

**ШЛЁПНУТЬСЯ** *сов. см.* **шлёпаться**

**ШЛЕПО́К** *м* **1.** (*удар ладонью*) сәпелдәү, сәпелдәтеү, шапылдатып (шап итеп) һуғыу **2.** (*звук от удара или падения*) тып (топ) итеү, тыпылдау

**ШЛЕЯ́** *ж* ышлыя

**ШЛИФОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое шымартыу ...ы, шымарта торған; **шлифова́льный стано́к** шымартыу станогы

**ШЛИФОВА́ЛЬЩИК** *м* и **ШЛИФОВА́ЛЬЩИЦА** *ж* шымартыусы

**ШЛИФОВА́ТЬ** *несов. что* **1.** шымартыу; **шлифова́ть де́рево** ағасты шымартыу **2.** (*полировать*) ялтыратыу **3.** *перен.* (*совершенствовать*) шымартыу, камиллаштырыу, яҡшыртыу; **шлифова́ть роль** ролде шымартыу

**ШЛИФОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*поддаваться шлифовке*) шымарыу **2.** *страд. от* **шлифова́ть**

**ШЛИФО́ВКА** *ж см.* **шлифова́ть**

**ШЛИ́ХТА** *ж*; *спец.* еп ашы (*туҡыуҙа буй епте ашлай торған елем*)

**ШЛИХТОВА́НИЕ** *с*; *спец. см.* **шлихтова́ть**

**ШЛИХТОВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* (еп) ашлау; **шлихтова́ть ткань** туҡыманы ашлау

**ШЛЮЗ** *м* шлюз (**1.** *караптарҙы үткәрә торған гидротехник ҡоролма* **2.** *быуа ҡапҡаһы* **3.** *тау. алтынға бай ҡомдо йыуа торған ауыш киң улаҡ рәүешендәге ҡулайлама*); **одноќа́мерный шлюз** бер камералы шлюз; **откры́ть шлюз** шлюзды асыу

**ШЛЮ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое шлюз ...ы; **шлю́зные воро́та** шлюз ҡапҡалары

**ШЛЮЗОВА́ТЬ** *сов., несов. что* **1.** (*устроить шлюзы*) шлюзлау, шлюз ҡороу (төҙөү); **шлюзова́ть ре́ку** йылғаға шлюз ҡороу **2.** (*пропустить через шлюзы*) шлюз аша уҙғарыу

**ШЛЮ́ПКА** *ж* шлюпка (*бәләкәй судно*); **спорти́вная шлю́пка** спорт (ярыш) шлюпкаһы

**ШЛЮ́ХА** *ж*; *груб., прост.* фәхишә, йөрөмтәл ҡатын

**ШЛЯ́ПА** *ж* **1.** эшләпә; **фе́тровая шля́па** фетр эшләпә; **шля́па с широ́кими поля́ми** киң тирәсле эшләпә **2.** (*о вялом человеке*) булдыҡһыҙ, бешмәгән, ебегән; **эх ты, шля́па** их һин, бешмәгән ♦ **де́ло в шля́пе** эш көйлө, эше бөткән (уңышлы)

**ШЛЯ́ПКА** *ж* **1.** (*небольшая женская или детская шляпа*) эшләпә **2.** (*гвоздя, шурупа*) баш; (*гриба*) эшләпә

**ШЛЯ́ПНИК** *м* и **ШЛЯ́ПНИЦА** *ж* эшләпәсе (эшләпә яһаусы)

**ШЛЯ́ТЬСЯ** *несов.*; *прост.* тик (буш) йөрөү, һәптәнләү

**ШЛЯХ** *м* (*наезженная дорога*) оло юл

**ШМЕЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое иңкеш ...ы; **шмели́ное гнездо́** иңкеш ояһы

**ШМЕЛЬ** *м* иңкеш

**ШМЫГ** *межд. в знач. сказ.*; *разг.* йылт итеп ҡалыу

**ШМЫ́ГАТЬ** *несов.*; *разг.* (*часто и быстро ходить*) үткеләп (үтеп-сүтеп, үтеп-китеп) йөрөү, арлы-бирле йөрөү ♦ **шмы́гать но́сом** танау тартыу, мыш-мыш килеү

**ШМЫГНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *см.* **шмы́гать** **2.** (*юркнуть*) йылт итеп ҡалыу

**ШНИ́ЦЕЛЬ** *м* шницель (*йоҡа телемләп йә үткәреп әҙерләнгән ит ризығы*)

**ШНУР** *м в разн. знач.* шнур, бау; **запа́льный шнур** яндырыу шнуры; **ме́рный шнур** үлсәү шнуры; **пове́сить карти́ну на шнуре́** картинаны бауға элеү; **электри́ческий шнур** электр шнуры

**ШНУРОВА́ТЬ** *несов. что* **1.** шнурлау, бәйләү; **шнурова́ть боти́нки** ботинканы шнурлау

**2.** шнурлау, шнур менән тегеү; **шнуровáть кни́гу** китапты шнур менән тегеү

**ШНУРÓВКА** *ж* **1.** *см.* **шнуровáть 2.** бау; **боти́нки со шнурóвкой** баулы ботинкалар

**ШНЫРЯ́ТЬ** *несов.*; *разг.* арлы-бирле йөрөү, тегеләй-былай йөрөп тороу ♦ **шныря́ть глазáми** *прост.* күҙҙәрҙе йөрөтөү, ҡараныу

**ШОВ** *м* **1.** *в разн. знач.* йөй; **разглáдить шов** йөйҙө яҙыу; **мéлкий шов** ваҡ йөй **2.** *тех.* йөй, ек (*беркетелгән урын*); **сварнóй шов** иретеп йәбештерелгән йөй ♦ **наложи́ть швы** *мед.* яраны тегеү; **снять швы** *мед.* яранан епте алыу; **ру́ки по швам** ҡулдарҙы төшөрөп шаҡ (тура) ҡатыу; **трещáть по всем швам** бөтөнләй емерелеү, ҡыйралыу

**ШОВИНИ́ЗМ** *м* шовинизм, шовинистлыҡ (*агрессив милләтселек, бер халыҡтың мәнфәғәтен генә өҫтөн ҡуйыусы*)

**ШОВИНИ́СТ** *м* шовинист (*шовинизм яҡлы кеше*)

**ШОВИНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое шовинистик, шовинизм ...ы; **шовинисти́ческие взгля́ды** шовинистик ҡараштар

**ШОК** *м*; *мед.* шок, шаңҡыу; **травмати́ческий шок** травма шогы

**ШОКИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* оялтыу, ояҭҡа (уңайһыҙ хәлдә) ҡалдырыу

**ШОКОЛÁД** *м* шоколад; **есть шоколáд** шоколад ашау

**ШОКОЛÁДКА** *ж* шоколадка (*бәләкәй генә шоколад*)

**ШОКОЛÁДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шоколад ...ы; **шоколáдная фáбрика** шоколад фабрикаһы **2.** шоколад ...ы, шоколадлы; **шоколáдное морóженое** шоколадлы туңдырма; **шоколáдная конфéта** шоколад кәнфите **3.** (*о цвете*) шоколад төҫөндәге, ҡара көрән

**ШÓМПОЛ** *м* шып, шыбыҡ (*көбәк таҙартыу ҡоралы*)

**ШÓРНИК** *м* шорник (*ҡайыштан сбруй һ.б. яһаусы*)

**ШÓРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡайыш, ҡайыштан яһалған; **шóрные издéлия** ҡайыш әйберҙәр **2.** еп-йышыу (сбруй) ...ы; **шóрная мастерскáя** еп-йышыу оҫтаханаһы

**ШÓРОХ** *м* ҡыштырлау, шыптырлау, шыштырлау; **шóрох ли́стьев** япраҡ ҡыштырлауы

**ШÓРЫ** *мн.* **1.** (*наглазники*) ҡолаҡһа **2.** (*упряжь без дуги и хомута*) мисәү ♦ **взять в шóры** *кого*; **держáть в шóрах** *кого кемде* йүгәндә тотоу

**ШОССÉ** *с нескл.* таш юл, шоссе; **éхать по шоссé** таш юлдан барыу

**ШОССÉЙНЫЙ,** -ая, -ое шоссе, шоссе ...ы; **шоссéйная дорóга** шоссе юл

**ШОТЛÁНДКА I** *ж см.* **шотлáндцы**

**ШОТЛÁНДКА II** *ж* шотландка (*шаҡмаҡлы туҡыма*)

**ШОТЛÁНДСКИЙ,** -ая, -ое шотланд ...ы, Шотландия ...ы; **шотлáндский язы́к** шотланд теле

**ШОТЛÁНДЦЫ** *мн.* шотландтар, шотланд халҡы // *ед.* **шотлáндец** *м* шотланд ир-аты; **шотлáндка** *ж* шотланд ҡатын-ҡыҙы

**ШОФЁР** *м* шофёр; **рабóтать шофёром** шофёр булып эшләү

**ШОФЁРСКИЙ,** -ая, -ое шофёр(ҙар) ...ы, шофёрлыҡ ...ы; **шофёрские ку́рсы** шофёрҙар курсы

**ШПÁГА** *ж* шпага, ҡылыс; **сражáться на шпáгах** шпага менән алышыу

**ШПАГÁТ** *м* шпагат, бау

**ШПАЖИ́СТ** *м* шпагасы; **соревновáние шпажи́стов** шпагасылар ярышы

**ШПАКЛЕВÁТЬ** *несов. что* тигеҙләп һылау, шпаклёвкалау; **шпаклевáть подокóнник** тәҙрә төбөн тигеҙләп һылау

**ШПАКЛЁВКА** *ж*; *спец.* **1.** *см.* **шпаклевáть 2.** (*замазка*) шпаклёвка

**ШПАКЛЁВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* **1.** шпаклёвка ...ы, шпаклёвкалау ...ы, һылау ...ы; **шпаклёвочные рабóты** һылау эштәре **2.** шпаклёвка ...ы, шпаклёвка өсөн тәғәйенләнгән; **шпаклёвочный материáл** шпаклёвка материалы

**ШПАКЛЁВЩИК** *м* шпаклёвкалаусы

**ШПÁЛА** *ж*; *ж.-д.* шпал; **положи́ть шпáлы** шпалдар һалыу

**ШПАЛÉРЫ** *мн.* (*ед.* **шпалéра** *ж*) шпалер (**1.** *стена көпләү өсөн ҡулдан эшләнгән һүрәтле келәм* **2.** *юлда ике яҡлап теҙелгән ғәскәри саф* **3.** *үҫемлек уралып үҫһен өсөн ботаҡтарын бәйләп ҡуя торған рәшәткә* **4.** *юлдың ике яғына ултыртылған ағастар* **5.** *иҫк. обой*)

**ШПАНÁ** *ж*; *груб.*, *прост.* шпана

**ШПАНГÓУТ** *м*; *мор.*, *ав.* шпангоут (*карап йәки самолёттың корпусына ныҡлыҡ бирер өсөн ҡуйылған арҡыры бурса*)

**ШПÁНКА** *ж* шпанка (*ҡуңыҙ төрө*)

**ШПАРГÁЛКА** *ж*; *разг.* шпаргалка; **спря́тать шпаргáлку** шпаргалканы йәшереү

**ШПÁРИТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*обдавать кипятком*) бешекләү; **шпáрить солóму** һалам бешекләү **2.** *что*; *разг.* (*обжигать*) бешереү, яндырыу; **шпáрить ру́ки** ҡулды бешереү **3.** *прост.* елдереү, һыпыртыу; (*о речи*) шатырлатып һөйләү; (*о дожде*) ҡойоу; (*об игре на каком-л. инструменте*) һыҙҙыртыу; **шпáрить по-немéцки** немецса шатырлатып һөйләү; **шпáрить на гармóшке** гармунда һыҙҙыртыу

**ШПАТ I** *м*; *мин.* шпат; **ци́нковый шпат** цинк шпаты

**ШПАТ II** *м*; *вет.* ҡарасҡаҡ, ыуа

**ШПÁТЕЛЬ** *м* шпатель, ҡалаҡ (*шпаклёвкалау өсөн*)

**ШПÁЦИЯ** *ж*; *полигр.* шпация (*хәрефте ҡулдан йыйғанда араларына ҡуя торған йоҡа ғына тимер*)

**ШПИГОВÁТЬ** *несов. кого-что* шпиклау, сусҡа майы тултырыу; **шпиговáть дичь** кейек итен шпиклау

**ШПИК I** *м* (*сало*) суҡса майы

**ШПИК II** *м*; *разг.* (*сыщик*) шымсы, шпик

**ШПИЛЬ** *м* **1.** *архит.* шпиль, осло ҡыйыҡ, манара **2.** *мор.* шпиль (*карапта якорҙы, йөктәрҙе һ.б. күтәреү өсөн вертикаль сығыр*)

**ШПИ́ЛЬКА** *ж* **1.** (*для волос*) шпилька, сәс ҡыҫтырғыс **2.** *спец.* (*гвоздь — в сапожном деле*) шпилька, даға, итек (туфли) ҡаҙауы **3.** *тех.* ҡаҙау, шпилька; **деревя́нные шпи́льки** ағас ҡаҙауҙар (*машинканың ике детален беркетә торған винтлы үҙәк*) **4.** *перен.* (*колкость*) сәнскеле (төртмә) һүҙ

**ШПИНА́Т** *м* шпинат (*йәшелсә*)

**ШПИНГАЛЕ́Т** *м* **1.** шыуҙырмалы бик; **дверно́й шпингале́т** ишектең шыуҙырмалы биге **2.** *разг.*, *шутл.* (*о невысоком юноше*) шуҡ малай (*бәләкәй кәүҙәле*)

**ШПИО́Н** *м* и **ШПИО́НКА** *ж* **1.** (*тот, кто занимается шпионажем*) шпион **2.** *разг.* (*тот, кто следит за кем-л., доносит на кого-л.*) шымсы, шпион

**ШПИОНА́Ж** *м* шпионлыҡ

**ШПИО́НИТЬ** *несов.* **1.** (*заниматься шпионажем*) шпионлыҡ итеү **2.** *за кем-чем* (*выслеживать*) шымсылыҡ итеү, күҙәтеү

**ШПИО́НСКИЙ,** -ая, -ое шпион(дар) ...ы, шпионлыҡ; **шпио́нская организа́ция** шпиондар ойошмаһы; **шпио́нский центр** шпионлыҡ үҙәге

**ШПИО́НСТВО** *с* шпионлыҡ, шымсылыҡ

**ШПИЦ** *м* шпиц (*бәләкәй йөнтәҫ эт*)

**ШПИЦРУ́ТЕНЫ** *мн.* (*ед.* **шпицру́тен** *м*); *ист.* шпицрутен (*һуҡтырыу өсөн тимерҙән яһалған һыйғыр сыбыҡ*)

**ШПЛИНТ** *м*; *тех.* шплинт, беркеткес

**ШПОН** *м* и **ШПО́НА** *ж* шпон (**1.** *полигр. йыйылған хәреф юлдары араһына ҡуйыла торған йоҡа металл пластинка* **2.** *тех. йәбештерелмәй эшләнгән бер ҡатлы фанер*)

**ШПО́РА** *ж* **1.** тибенге, шпор; **щёлкнуть шпо́рами** шпорҙарҙы шаҡылдатып ҡуйыу **2.** (*у птиц*) тибенге, типке, текәүер

**ШПО́РИТЬ** *несов. кого* шпорлау, шпор менән типкеләү; **шпо́рить коня́** атты шпор менән типкеләү

**ШПРИЦ** *м* шприц; **вогна́ть шприц в ко́жу** шприцты тирегә индереү

**ШПРО́ТЫ** *мн.* (*ед.* **шпро́та** *ж* и **шпрот** *м*) шпрот (*ваҡ диңгеҙ балығы һәм шул балыҡтың консерваһы*)

**ШПУ́ЛЬКА** *ж* сүре (шүре), кәтүк

**ШПУНТ** *м*; *спец.* шпунт (*таҡтаның, бурсаның ҡыр сығынтыһы*)

**ШПУНТОВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* шпунтлау, шпунт яһау

**ШПУР** *м* шпур (**1.** *тау. тау тоҡомдарын шартлатыу өсөн быраулап тишелгән ҡоҙоҡ* **2.** *тех. шахта мейесендә иретелгән матдәләрҙе ағыҙыу өсөн эшләнгән тишек*)

**ШПЫНЯ́ТЬ** *несов. кого-что*; *прост.* **1.** (*колоть, тыкать*) төртөү, сәнсеү, ҡаҙау **2.** *перен.* (*донимать попрёками*) мыжыу, игәү, теңкәгә тейеү

**ШРАМ** *м* яра эҙе, йөй, бирсә

**ШРАПНЕ́ЛЬ** *ж* шрапнель (*пулялы туп*)

**ШРАПНЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое шрапнель ...ы, шрапнелле; **шрапне́льный ого́нь** шрапнель уты; **шрапне́льный снаря́д** шрапнель снаряды

**ШРИФТ** *м* шрифт, хәреф; **кру́пный шрифт** эре шрифт; **типогра́фский шрифт** типография шрифы; **курси́вный шрифт** курсив шрифы

**ШТАБ** *м* штаб; **Генера́льный штаб** Генераль штаб; **штаб диви́зии** дивизия штабы

**ШТА́БЕЛЬ** *м* штабель, өйөм, эрҙәнә; **штабеля́ кирпиче́й** кирбес өйөмдәре; **шта́бель дров** утын эрҙәнәһе

**ШТАБ-КВАРТИ́РА** *ж* штаб-квартира (**1.** *хәрби штаб урынлашҡан йорт* **2.** *күсм. нимәнеңдер төп пункты*)

**ШТАБНО́Й,** -ая, -ое **1.** штаб ...ы; **штабно́й офице́р** штаб офицеры **2.** *в знач. сущ.* **штабно́й** *м* штабсы, штабта хеҙмәт итеүсе

**ШТАКЕ́ТНИК** *м* **1.** *собир.* (*планки*) штакетник **2.** (*забор*) штакетник, рәшәткә, текмә

**ШТАМП** *м* **1.** (*печать*) штамп, мөһөр, мисәт; **поста́вить штамп** мөһөр һуғыу **2.** *тех.* (*инструмент*) штамп, пресс ҡалыбы; (*для чеканки*) саҡма **3.** *перен.* штамп; **театра́льный штамп** театраль штамп

**ШТАМПОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡалыплау ...ы, штамплаусы ...ы; **штампова́льный пресс** штамплаусы пресс

**ШТАМПО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **штампова́ть** **2.** *прил.*; *тех.* штампланған, штамп менән эшләнгән; **штампо́ванные изде́лия** штамп менән эшләнгән әйберҙәр **3.** *прил.*; *перен.* күп сәйнәлгән, тапалған, таушалған; **штампо́ванные слова́** тапалған һүҙҙәр

**ШТАМПОВА́ТЬ** *несов. что* **1.** (*ставить штамп*) мөһөр (штамп, мисәт) һуғыу (баҫыу), мөһөрләү, штамплау; **штампова́ть бума́гу** ҡағыҙға мөһөр баҫыу **2.** *тех.* штамплау, штамп менән эшләү; **штампова́ть дета́ли** деталдәр штамплау **3.** *перен.*, *разг.* штамплау (*әҙер ҡалып буйынса эш итеү*)

**ШТАМПО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **штампова́ть** 1, 2; **штампо́вка дета́лей** деталдәрҙе штамплау; **горя́чая штампо́вка** ҡайнар штамповка **2.** (*изделие*) штамповка

**ШТАМПО́ВЩИК** *м* и **ШТАМПО́ВЩИЦА** *ж* штамплаусы

**ШТА́НГА** *ж* штанга; **подня́ть шта́нгу** штанга күтәреү; **мяч попа́л в шта́нгу** туп штангаға бәрелде; **бурова́я шта́нга** *тех.* быраулау штангаһы

**ШТАНГЕНЦИ́РКУЛЬ** *м* штангенциркуль (*әйберҙәрҙең ҡалынлығын йәки тыңҡәк тишектәрҙең киңлеген үлсәү ҡоралы*)

**ШТАНГИ́СТ** *м* штангасы

**ШТАНИ́НА** *ж*; *разг.* балаҡ

**ШТАНИ́ШКИ** *мн.*; *уменьш.-ласк. от* **штаны́**

**ШТАНЫ́** *мн.*; *разг.* ыштан

**ШТА́ПЕЛЬ** *м* штапель (**1.** *махс. химик юл менән алынған еп* **2.** *һөйл. шул ептән һуғылған туҡыма*)

**ШТА́ПЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое штапель, штапелдән тегелгән; **шта́пельное пла́тье** штапель күлдәк

**ШТАТ I** *м* **1.** штат (*федератив төҙөлөшлө илдәрҙә дәүләт-территориаль берәмек*) **2.** *мн.* **шта́ты**; *ист.* штат (*урта быуаттарҙа Нидерландыла һәм Францияла айырым сословие вәкилдәренән торған учреждениелар исеме*)

**ШТАТ II** *м* штат (*предприятиела, учреждениела хеҙмәт итеүселәр*); **сократи́ть штат** штатты ҡыҫҡартыу; **штат медрабо́тников** медицина хеҙмәткәрҙәре штаты

**ШТАТИ́В** *м* төплөк, өсаяҡ, штатив; **штати́в фотоаппара́та** фотоаппарат өсаяғы; **штати́в микроско́па** микроскоп штативы

**ШТА́ТНЫЙ,** -ая, -ое штаттағы, штатта тороусы, штат буйынса, штат ...ы; **шта́тный сотру́дник** штаттағы хеҙмәткәр; **шта́тная до́лжность** штаттағы вазифа ♦ **шта́тное расписа́ние** штат расписаниеһы (*учреждениелағы хеҙмәткәрҙәр һанын, вазифаһын һәм эш хаҡын билдәләгән документ*)

**ШТА́ТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** штатский; **шта́тская оде́жда** штатский кейем **2.** *в знач. сущ.* **шта́тский** *м* штатский; **быть шта́тским** штатский булыу **3.** *в знач. сущ.* **шта́тское** *с* ғәҙәти (ҡәҙимге, штатский) кейем; **он в шта́тском** ул ҡәҙимге кейемдә

**ШТЕМПЕЛЕВА́ТЬ** *несов. что* штемпелләү, штемпель баҫыу (һуғыу)

**ШТЕ́МПЕЛЬ** *м* штемпель, мисәт, келәймә; **почто́вый ште́мпель** почта штемпеле

**ШТЕ́МПЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое штемпель ...ы; **ште́мпельная кра́ска** штемпель буяуы

**ШТЕ́ПСЕЛЬ** *м* штепсель; **включи́ть ште́псель** штепселде тоташтырыу

**ШТЕ́ПСЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое штепсель ...ы; **ште́псельная розе́тка** штепсель розеткаһы; **ште́псельная ви́лка** штепсель вилкаһы

**ШТИБЛЕ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **штибле́та** *ж*) штиблет (*ирҙәр аяҡ кейеме*)

**ШТИЛЕВО́Й,** -ая, -ое һил, тып-тын, елһеҙ; **штилева́я пого́да** һил һауа

**ШТИЛЬ** *м* һиллек, тынлыҡ, елһеҙлек (*диңгеҙҙә, йылғала, күлдә*)

**ШТИФТ** *м*; *тех.* штифт (*цилиндр йәки конус формаһындағы бәләкәй тимер кендек, винт*)

**ШТО́ЛЬНЯ** *ж*; *горн.* штольня; **вентиляцио́нная што́льня** еләтеү штольняһы

**ШТО́ПАЛЬНЫЙ,** -ая, -ое типсеү ...ы, йүрмәү ...ы, (бәйләп, үреп) ямай торған; **што́пальная игла́** типсеү энәһе

**ШТО́ПАНЫЙ,** -ая, -ое йүрмәлгән, (үреп, бәйләп) ямалған, ямаулы; **што́паная руба́шка** ямаулы күлдәк

**ШТО́ПАТЬ** *несов. что* йүрмәү, (үреп, бәйләп) ямау; **што́пать чулки́** ойоҡтарҙы йүрмәү

**ШТО́ПКА** *ж* **1.** *см.* **што́пать 2.** *разг.* (*нитки для штопанья*) йүрмәү ебе, үреп (типсеп) ямау ебе **3.** *разг.* (*заштопанное место*) йүрмәлгән, (үреп, бәйләп) ямалған урын

**ШТО́ПОР** *м* **1.** тығынһурғыс, штопор **2.** *ав.* штопор (*юғары пилотаж фигураһы*); **войти́ в што́пор** штопорға инеү

**ШТО́ПОРИТЬ** *несов.*; *ав.* штопор яһау, түбәнгә текә төшөү

**ШТО́РА** *ж* тәҙрә пәрҙәһе (ҡорғаны); **опусти́ть што́ру** тәҙрә пәрҙәһен төшөрөү

**ШТОРМ** *м* дауыл, шторм (*йәҙәттә диңгеҙҙә*)

**ШТОРМИ́ТЬ** *несов.*; *мор.* дауыллап (штормлап) тороу; **мо́ре штормило уже́ неде́лю** бер аҙна инде диңгеҙ дауыллап тора

**ШТОРМОВА́ТЬ** *несов.*; *мор.* **1.** (*выдерживать шторм*) дауылға ҡаршы тора алыу **2.** *см.* **шторми́ть**

**ШТОРМОВО́Й,** -ая, -ое **1.** дауыллы, штормлы; **штормова́я пого́да** дауыллы көн; **штормово́й ве́тер** дауыллы ел **2.** дауыл ...ы, шторм ...ы; **штормово́й я́корь** шторм якоры

**ШТОФ** *м* штоф (*декорация өсөн ҡулланылған эре биҙәкле ҡалын туҡыма*)

**ШТО́ФНЫЙ,** -ая, -ое штофтан тегелгән, штоф менән көпләнгән; **што́фная ме́бель** штоф менән көпләнгән мебель

**ШТРАФ** *м* штраф; **взима́ть штраф** штраф алыу; **наложи́ть штраф** штраф һалыу

**ШТРАФНИ́К** *м*; *разг.* штрафник (**1.** *хәрби тәртипте боҙған хеҙмәткәр* **2.** *уйын ҡағиҙәһен боҙған спортсы*)

**ШТРАФНО́Й,** -ая, -ое штраф ...ы; **штрафны́е де́ньги** штраф аҡсаһы; **штрафно́й уда́р** штраф һөжүме; **штрафна́я скамья́** штраф эскәмйәһе

**ШТРАФОВА́ТЬ** *несов. кого-что* штраф һалыу (түләтеү)

**ШТРЕЙКБРЕ́ХЕР** *м* штрейкбрехер (*забастовка ваҡытында эш ташламай эшләүсе; эшселәр мәнфәғәтенә хыянат итеүсе*)

**ШТРЕК** *м*; *горн.* штрек (*шахтала ер аҫты юлы*)

**ШТРИ́ПКА** *ж* балаҡ таҫмаһы; **брю́ки со штри́пками** балағы таҫмалы салбар

**ШТРИХ** *м* **1.** штрих, нәҙек һыҙыҡ; **то́чные штрихи́** аныҡ штрихтар **2.** *перен.* штрих, үҙенсәлек; **любопы́тный штрих в расска́зе** хикәйәнең ҡыҙыҡлы үҙенсәлеге

**ШТРИХОВА́ТЬ** *несов. что* штрихлау, нәҙек һыҙыҡтар һыҙыу; **штрихова́ть фо́то** фотоны штрихлау

**ШТРИХО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **штрихова́ть 2.** штрихтар, нәҙек һыҙыҡтар; **ре́дкая штрихо́вка** һирәк штрихтар

**ШТРИХОВО́Й,** -ая, -ое штрихлы, нәҙек һыҙыҡлы; **штрихово́й орна́мент** штрихлы биҙәк

**ШТУДИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* ныҡлап (ентеклэп) өйрэнеү (уҡыу); **штуди́ровать роль** ролде ныҡлап өйрэнеү

**ШТУ́КА** *ж* **1.** (*отдельный предмет из числа однородных*) дана; (*единица счёта скота, некоторых овощей*) баш, бөртөк; **штук пять яи́ц** биш дана йомортҡа; **по рублю́ за шту́ку** данаһы бер һум **2.** *разг.* (*выходка, проделка*) мутлыҡ, ҡыланыш, ҡылыҡ; **быть спосо́бным на ра́зные шту́ки** төрлө мутлыҡтарға маһир булыу **3.** *разг.* (*хитрость, уловка*) хэйлэ, уйҙырма, хэл, күренеш, эш, нэмэ; **он ухитри́лся сде́лать таку́ю шту́ку** ул шундай нэмэне уйлап тапҡан **4.** (*о рулоне ткани*) киҫэк, ос; **шту́ка полотна́** туҡыма киҫэге ♦ **вот так шту́ка!** бына һиңэ кэрэк булһа!; **не шту́ка** *в знач. сказ.* ҡыйын түгел

**ШТУКАТУ́Р** *м* штукатур, штукатурсы

**ШТУКАТУ́РИТЬ** *несов. что* и *без. доп.* штукатурлау, һылау; **штукату́рить дом** өйҙө штукатурлау

**ШТУКАТУ́РКА** *ж* **1.** *см.* **штукату́рить**; **штукату́рка стен** стеналарҙы штукатурлау **2.** штукатурка; **покры́ть сте́ну штукату́ркой** стенаны штукатурка менэн ҡаплау ♦ **суха́я штукату́рка** ҡоро штукатурка

**ШТУКАТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое штукатурлау ...ы; **штукату́рные рабо́ты** штукатурлау эштэре; **штукату́рный раство́р** штукатурлау иҙмэһе

**ШТУКОВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* йөйөн белендермэй ямау (тегеү)

**ШТУКО́ВКА** *ж*; *спец.* **1.** *см.* **штукова́ть** **2.** ямалған (тегелгэн) урын

**ШТУРВА́Л** *м* штурвал; **стоя́ть за штурва́лом комба́йна** комбайн штурвалында тороу

**ШТУРВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** штурвал ...ы, штурвал ярҙамында; **штурва́льная ру́бка** штурвал рубкаһы; **штурва́льное управле́ние** штурвал ярҙамында идара итеү **2.** *в знач. сущ.* **штурва́льный** *м* штурвалсы, штурвалда тороусы

**ШТУРМ** *м* **1.** (*атака*) штурм, ҡаты һөжүм; **взять го́род шту́рмом** ҡаланы штурм менэн алыу; **штурм го́рной верши́ны** бейеклеккэ ҡаты һөжүм **2.** (*овладение чем-л.*) яулау, эйэ булыу, еңеү; **штурм ко́смоса** йыһанды яулау

**ШТУ́РМАН** *м* штурман; **шту́рман да́льнего пла́вания** алыҫҡа йөҙөү штурманы

**ШТУ́РМАНСКИЙ,** -ая, -ое штурман(дар) ...ы; **шту́рманская до́лжность** штурман вазифаһы

**ШТУРМОВА́ТЬ** *несов. что* **1.** штурмлау, штурм яһау, һөжүм итеү; **штурмова́ть кре́пость** ҡэлғэне штурмлау **2.** яулау, эйэ булыу; **штурмова́ть Се́вер** Төньяҡты яулау

**ШТУРМОВИ́К** *м* штурмовик (*ерҙэге объекттарға һөжүм яһаусы хэрби самолёт*)

**ШТУРМОВО́Й,** -ая, -ое штурм ...ы, штурм яһаусы; **штурмовы́е дни** штурм көндэре; **штурмовы́е коло́нны** штурм яһаусы колонналар; **штурмова́я авиа́ция** штурм авиацияһы

**ШТУФ** *м*; *геол.* штуф (*минерал йэки мэғдэн киҫэге*)

**ШТУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ваҡлап (даналап, берэмлэп) һатыу (һатыла торған); **шту́чная прода́жа** ваҡлап һатыу; **шту́чный това́р** берэмлэп һатыла торған тауар

**ШТЫК** *м* **1.** штык; **гранёный штык** ҡырлы штыҡ; **отря́д в ты́сячу штыко́в** бер мең штыктан торған отряд **2.** *спец.* бер көрэк ҡалынлығы ер ♦ **в штыки́ (идти́, ходи́ть и т.п.)** штыкка штык барыу; **встре́тить (приня́ть и т.п.) в штыки́** *кого-что* ҡаршы тороу, ҡабул итмэү, килешмэү; **как штык (прийти́, яви́ться и т.п.)** теп-теүэл, һис шикһеҙ (килеп етеү)

**ШТЫКОВО́Й,** -ая, -ое штык ...ы; **штыково́й бой** штык һуғышы

**ШУ́БА** *ж* тун; **кры́тая шу́ба** тышланған тун; **наго́льная шу́ба** ҡуйтыр тун; **ли́сья шу́ба** төлкө тун ♦ **не шу́бу шить** *из чего шутл.* бер нэмэгэ лэ кэрэге юҡ; **шу́бы не сошьёшь** *из чего шутл.* бер ниндэй файҙаһы ла булмаҫ, бер нэмэ лэ килеп сыҡмаҫ

**ШУГА́** *ж* (*мелкий рыхлый лёд*) сыйҙым, шыя

**ШУ́ЛЕР** *м* **1.** (*в карточной игре*) шулер, хэйлэлэп уйнаусы **2.** *разг.* (*мошенник, обманщик*) алдаҡсы

**ШУ́ЛЕРСКИЙ,** -ая, -ое шулер(ҙар) ...ы; **шу́лерская игра́** шулерҙар уйыны; **шу́лерский приём** шулер алымы

**ШУ́ЛЕРСТВО** *с* **1.** (*нечестная игра в карты*) шулерлыҡ, хэйлэлэп уйнау **2.** *разг.* (*мошенничество*) алдаҡсылыҡ

**ШУМ** *м* **1.** тауыш, шау, шау-шыу; **шум ве́тра** ел шауы; **шум шаго́в** аяҡ тауыштары; **шум в за́ле смолк** залда шау-шыу тынды **2.** *разг.* (*крик*) тауыш, шау-шыу, ҡысҡырыш, дау **3.** *перен.* (*толки*) шау-шыу, тауыш; **пье́са наде́лала мно́го шу́ма** пьеса ҙур шау-шыу ҡуптарҙы **4.** *мед.*, *физ.* шау; **шум в се́рдце** йөрэктэге шау ♦ **шум в голове́** баш шаулай; **шум в уша́х** ҡолаҡ шаулай

**ШУМЕ́РЫ** *мн.* (*ед.* **шуме́р** *м*) шумерҙар, шумер халҡы (*Тигр һэм Евфрат йылғаларының көньяҡ өлөшөндэ йэшэгэн мэҙэниэтле боронғо халыҡ*; *тэү башлап шына яҙыуы ҡулланғандар*)

**ШУМЕ́ТЬ** *несов.* **1.** тауышланыу, шаулау; **лес шуми́т** урман шаулай; **го́сти шуме́ли** ҡунаҡтар шауланы **2.** (*браниться*) тауышланыу, шаулау, тауыш күтэреү, шау-шыу күтэреү, ҡысҡырышыу **3.** *перен.*, *разг.* (*излишне много говорить*) шаулау, күп һөйлэү; **шуме́ть о преобразова́нии школ** мэктэптэрҙе үҙгэртеп ҡороу тураһында күп һөйлэү; **шуме́ть о но́вом рома́не** яңы роман тураһында шаулау ♦ **шуми́т в голове́** баш шаулай; **шуми́т в уша́х** ҡолаҡ шаулай

**ШУМИ́ХА** *ж*; *разг.*, *неодобр.* ғауға, шау-шыу; **подня́ть шуми́ху** шау-шыу күтэреү

**ШУМЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** тауышлы, шаулап торған, шау-шыулы; **шумли́вый самова́р** шаулап торған самауыр **2.** (*склонный шуметь*) тауыш-

ланыусан, шаулаусан, ғауғасыл; **шумли́вые де́ти** ғауғасыл балалар **3.** шау-шыулы, йәнле; **шумли́вые дни** шау-шыулы көндәр; **шумли́вый торг** йәнле сауҙа **4.** *перен., разг.* (*напыщенный, громкий*) шаулы, ҡабарынҡы, яңғырауыҡлы; **шумли́вые фра́зы** яңғырауыҡлы фразалар

**ШУ́МНО 1.** *нареч.* тауышланып, шаулашып, шаулап, шау-шыу менән; **собра́ние прошло́ шу́мно** йыйылыш шау-шыу менән уҙҙы; **шу́мно обсужда́ть** *что-л. берәй нәмәне* шаулашып тикшереү **2.** *в знач. сказ., безл.* тауышлы, шаулы, шау-шыулы; **на у́лице о́чень шу́мно** урамда бик тауышлы

**ШУ́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* тауышлы, шаулы, шаулап торған, шау-шыулы; **шу́мный водопа́д** шаулы шарлауыҡ; **шу́мная у́лица** шау-шыулы урам; **шу́мный го́род** шаулы ҡала; **шу́мный пра́здник** шау-шыулы байрам **2.** *перен.* (*сенсационный*) шаулы, шау-шыу ҡуптарған; **шу́мный успе́х** шау-шыу ҡуптарған уңыш ♦ **шу́мные согла́сные** *лингв.* шаулы тартынҡылар

**ШУМО́ВКА** *ж* һөҙгөс

**ШУМОВО́Й,** -ая, -ое тауышлы; **шумово́й орке́стр** тауышлы оркестр

**ШУМО́К** *м*; *разг.* әкрен тауыш, әкрен шау-шыу, ишетелер-ишетелмәҫ һөйләшеү ♦ **под шумо́к** аҫтыртын ғына, йәшерен-боҫорон ғына

**ШУ́РИН** *м* (*брат жены — старший*) ҡайнаға; (*младший*) ҡәйнеш

**ШУРОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.*; *тех.* ҡағыштырыу, болғатыу (*яна торған мейестә*) **2.** *прост.* (*энергично действовать*) шартлатып эшләү

**ШУРУ́М-БУРУ́М** *м собир.*; *прост.* юҡ-бар, иҫке-моҫҡо, шором-бором

**ШУРУ́П** *м* шөрөп; **закрути́ть шуру́п** шөрөптө бороп ҡуйыу

**ШУРФ** *м*; *горн.* шурф (*ҡаҙылма байлыҡтар эҙләү, шартлатыу эштәре үткәреү өсөн бик үк тәрән итмәйенсә тура йәки ауыш итеп ҡаҙылған урын*); **пробури́ть шурф** шурф быраулау

**ШУРФОВА́ТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *горн.* шурфлау, шурф ҡаҙып эҙләү

**ШУРША́НИЕ** *с см.* **шурша́ть**

**ШУРША́ТЬ** *несов.* **1.** ҡыштырлау, шыптырлау, шыштырлау; (*о дожде*) шыптырлау **ли́стья шурша́т** япраҡтар шыптырлай **2.** *чем* ҡыштырлатыу, шыштырлатыу; **шурша́ть страни́цами кни́ги** китап биттәрен ҡыштырлатыу

**ШУ́СТРЫЙ,** -ая, -ое *разг.* сос, теремек, йылғыр; **быть шу́стрым** йылғыр булыу; **шу́стрый ма́льчик** сос малай

**ШУТ** *м*; *ист.* **1.** кәмитсе (*бай йортондағы*) **2.** *перен., разг.* мәрәкәсе, мәҙәксе, көлдөрөүсе **3.** *разг., в составе выражений*: **шут его́ зна́ет** уны кем (шайтан) белһен; **шут с ним** суҡынып китһен; **на кой шут** нимәгә кәрәк ул ♦ **шут горо́ховый** *см.* **горо́ховый**

**ШУТИ́ТЬ** *несов.* **1.** шаярыу, шаяртыу, уйнап һөйләшеү; **люби́ть шути́ть** шаярырға яратыу; **вы шу́тите?** һеҙ шаяртаһығыҙмы? **2.** *над кем-чем* (*насмехаться*) мәрәкәләү, тәләкәләү, мәҙәкләү, көлөү, мыҫҡыллап көлөү **3.** *чем* шаярыу, иҫәпкә алмау, иғтибар итмәү, һанға һуҡмау; **не шути́те со здоро́вьем** сәләмәтлегегеҙ менән шаярмағыҙ ♦ **шу́тки шути́ть**: 1) шаярыу, шаяртыу, уйнап һөйләшеү; 2) *над кем-чем* мәрәкәләү, мәҙәкләү, көлөү, мыҫҡыллап көлөү; **шути́ть с огнём** ут менән уйнау; **чем чёрт не шу́тит!** ғәжәп түгел; булыуы бик мөмкин; кем белә, нимә генә булмай

**ШУ́ТКА** *ж* шаяртыу, шаярыу, мәҙәк, ҡыҙыҡ, мәрәкә; **зла́я шу́тка** уҫал шаяртыу; **шу́тки ра́ди** мәҙәк өсөн ♦ **в шу́тку** шаяртып; **кро́ме шу́ток** *см.* **кро́ме**; **не на (не в) шу́тку** ысынтылап, шаярып түгел; **сыгра́ть шу́тку** шаяртып берәй күңелһеҙ эш ҡылыу; **шу́тки в сто́рону** шаярыуҙы ситкә ҡуйып тор; **шу́тка ли (сказа́ть)** *в знач. вводн. сл.* әйтеүе анһат, уйын эшме ни, уйынмы ни; **шу́тки пло́хи** *с кем-чем кем-нимә менән* шаярып булмай, һағыраҡ булырға кәрәк

**ШУТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* шаяртыусан, шаярырға яратыусан, мәрәкәсел, уйынсыл, йор; **шутли́вый челове́к** мәрәкәсел кеше; **шутли́вый тон** уйынсыл тон **2.** шаян, көлкөлө; **шутли́вый разгово́р** шаян һөйләшеү; **шутли́вая пе́сенка** шаян йыр

**ШУТНИ́К** *м* и **ШУТНИ́ЦА** *ж* шаян, мәрәкәсел, шаяртырға яратыусы, йор (*кеше*)

**ШУТОВСКО́Й,** -ая, -ое **1.** кәмитсе(ләр) ...ы, мәҙәксе(ләр) ...ы, көлдөрөүсе(ләр) ...ы; **шутовско́й наря́д** кәмитселәр кейеме **2.** кәмитселәр кеүек, мәҙәкселәргә хас; **шутовски́е вы́ходки** кәмитселәр кеүек ҡыланыштар

**ШУТОВСТВО́** *с* кәмитселек, мәҙәкселек

**ШУ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое көлкөлө, күңелле, ҡыҙыҡлы, шаян; **шу́точное стихотворе́ние** көлкөлө шиғыр; **шу́точный разгово́р** ҡыҙыҡлы һөйләшеү

**ШУТЯ́** *нареч.* **1.** анһат ҡына, еңел генә; **шутя́ отде́латься** анһат ҡына ҡотолоу; **учи́ться шутя́** еңел генә уҡыу **2.** шаярып, шаяртып; **говори́ть шутя́** шаяртып һөйләү ♦ **не шутя́** ысынлап

**ШУ́ШЕРА 1.** *ж собир.*; *уст.* (*хлам*) алам-һалам **2.** *м* и *ж собир.*; *прост.* юҡ-бар кеше, әтрәгәләм; **связа́ться со вся́кой шу́шерой** теләһә ниндәй әтрәгәләм менән бәйләнешкә инеү

**ШУШУ́КАНЬЕ** *с*; *разг.* **1.** *см.* **шушу́каться** **2.** *обычно мн.* **шушу́канья** (*сплетни*) ғәйбәт, бышылдашыу, шыбырлашыу, быш-быш килеү

**ШУШУ́КАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** *с кем* и *без доп.* бышылдашыу, шыбырлашыу, быш-быш килеү **2.** (*сплетничать*) ғәйбәт һатыу; **шушу́каться по угла́м** мөйөш һайын ғәйбәт һатыу

**ШХЕ́РЫ** *мн.* шхерҙар (*ҡаялы ваҡ утрауҙар*)

**ШХУ́НА** *ж* шхуна (*ике йәки өс елкәнле кәмә*)

**ШШ** *межд.* шш, тшш, тсс; **шш, слу́шайте** тсс, тыңлағыҙ

# Щ

**ЩАВЕ́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡуҙғалаҡ ...ы; **щаве́левый вкус** ҡуҙғалаҡ тәме **2.** ҡуҙғалаҡтан (әҙерләнгән, бешерелгән), ҡуҙғалаҡ ...ы; **щаве́левый пиро́г** ҡуҙғалаҡ бәлеше ♦ **щаве́левая кислота́** *хим.* ҡуҙғалаҡ кислотаһы

**ЩАВЕ́ЛЬ** *м* ҡуҙғалаҡ; **щаве́ль ко́нский** ат ҡуҙғалағы

**ЩАДИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** (*давать пощаду кому-л.*) аяу, йәлләү, мәрхәмәт күрһәтеү **2.** (*относиться бережно к кому-чему-л.*) һаҡлау, ҡыҙғаныу, йәлләү; **щади́ть своё здоро́вье** сәләмәтлегеңде һаҡлау

**ЩЕБЁНКА** *ж*; *разг. см.* **ще́бень**

**ЩЕБЁНОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ваҡ (ваҡланған) таш (кирбес) ...ы; **щебёночный заво́д** ваҡ таш заводы **2.** ваҡ (ваҡланған) таштан (кирбестән) торған (әҙерләнгән); **щебёночное основа́ние мостово́й** нигеҙе ваҡ таштан торған юл

**ЩЕ́БЕНЬ** *м* **1.** ваҡ (ваҡланған) таш (кирбес) **2.** *геол.* щебень (*осло мөйөшлө ватыҡтарҙан торған ултырма тау тоҡомо*)

**ЩЕ́БЕТ** *м* сутылдау, серкелдәү, сырҡылдау, сер-сер (серк-серк, сырҡ-сырҡ) итеү; **пти́чий ще́бет** ҡоштар сутылдауы

**ЩЕБЕТА́ТЬ** *несов.* **1.** сутылдау, серкелдәү, сырҡылдашыу, сырылдашыу, сер-сер (серк-серк, сырҡ-сырҡ) итеү, һайрау; **в не́бе щебета́ли ла́сточки** күктә ҡарлуғастар сырылдашты **2.** *перен.*, *разг.* (*обычно о детях и женщинах*) сәрелдәү, сутырлау, тәтелдәү

**ЩЕБЕТУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* **1.** серкелдәк, сутылдаҡ **2.** *перен.* (*о девочке, женщине*) тәтелдәк, сәрелдәк

**ЩЕГЛЁНОК** *м* көйәҙ турғай (ҡупшыҡай) балаһы

**ЩЕГО́Л** *м* көйәҙ турғай, ҡупшыҡай

**ЩЕГОЛЕВА́ТОСТЬ** *ж* ҡупшылыҡ, көйәҙлек, фыртлыҡ

**ЩЕГОЛЕВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*нарядный, модный — об одежде, вещах*) ҡупшы; **щеголева́тые сапоги́** ҡупшы итектәр **2.** (*с щегольством одетый*) ҡупшы (ыҫпай, фырт) кейенгән; **щеголева́тый па́рень** ҡупшы кейенгән егет

**ЩЁГОЛЬ** *м* ҡупшыҡай, көйәҙ; **он был щёголь** ул ҡупшыҡай ине

**ЩЕГОЛЬСКО́Й,** -ая, -ое **1.** бик ҡупшы; **щегольско́е пальто́** бик ҡупшы пальто **2.** (*молодцеватый, бравый*) фырт, көйәҙ, ыҫпай, ғәййәр егеттәрсә, егеттәр һымаҡ; **щегольско́й вид** фырт ҡиәфәт

**ЩЕГОЛЬСТВО́** *с* **1.** ҡупшылыҡ, көйәҙлек, фыртлыҡ; **отлича́ться щегольство́м** ҡупшылыҡ менән айырылып тороу **2.** (*хвастовство*) маҡтансыҡлыҡ; **заме́тное щегольство́** һиҙелеп торған маҡтансыҡлыҡ

**ЩЕГОЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** (*нарядно одеваться*) ҡупшыланыу, көйәҙләнеү, ҡупшы (фырт) кейенеү **2.** *в чём*; *разг.* ҡупшыланып (көйәҙләнеп) йөрөү; **щеголя́ть в но́вом пальто́** яңы пальтола ҡупшыланып йөрөү **3.** *чем*; *перен.* ҡупайыу, ҡупырайыу, маҡтаныу, маһайыу, һауаланыу; **щеголя́ть свои́ми зна́ниями** белеме менән маһайыу

**ЩЕ́ДРОСТЬ** *ж* йомартлыҡ; **проявля́ть ще́дрость** йомартлыҡ күрһәтеү

**ЩЕ́ДРЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прям.*, *перен.* йомарт; **ще́дрый челове́к** йомарт кеше; **ще́дрый на похвалы́** маҡтауға йомарт **2.** (*богатый, обильный*) бай, йомарт, мул; **ще́драя земля́** бай ер **3.** (*ценный*) ҡиммәтле; **ще́дрый пода́рок** ҡиммәтле бүләк ♦ **ще́дрою руко́ю** йәлләмәйенсә, һаранланмайынса

**ЩЕКА́** *ж* яңаҡ; **впа́лые щёки** эскә батып торған яңаҡтар; **поцелова́ть в щёку** яңағынан үбеп алыу ♦ **уплета́ть (упи́сывать) за о́бе щёки** ике яңағына ла төйөп, ҡомһоҙланып ашау

**ЩЕКА́СТЫЙ,** -ая, -ое *прост.* тулы яңаҡлы

**ЩЕКО́ЛДА** *ж* бик, келә; **запере́ть на щеко́лду** келәгә бикләү

**ЩЕКОТА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* ҡытыҡлау **2.** *что*, *в чём безл.* ҡымырйыу, ҡымырйытып тороу; **у меня́ в го́рле щеко́чет** минең тамаҡ төбөм ҡымырйый **3.** *перен.* (*возбуждать*) ҡытыҡлау; **щекота́ть самолю́бие** мин-минлекте ҡытыҡлау

**ЩЕКО́ТКА** *ж* ҡытыҡ, ҡытыҡлау; **боя́ться щеко́тки** ҡытыҡлауҙан ҡурҡыу

**ЩЕКОТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* ҡытыҡсан **2.** сетерекле, иғтибар талап иткән; **щекотли́вое положе́ние** сетерекле хәл; **щекотли́вый вопро́с** сетерекле мәсьәлә

**ЩЕКО́ТНО** *кому в знач. сказ.*, *безл.* ҡытыҡ килеү; **ему́ бы́ло щеко́тно** уның ҡытығы килә ине

**ЩЕЛЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** *тех.* (күп) тишекле; **щелева́я анте́нна** тишекле антенна **2.** *лингв. см.* **фрикати́вный**

**ЩЕЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ярыҡ-йороҡло, тишек-тошоҡло; **щели́стый забо́р** ярыҡ-йороҡло ҡойма

**ЩЁЛКАНЬЕ** *с см.* **щёлкать**

**ЩЁЛКАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*давать щелчки*) сиртеү; **щёлкать по лбу** маңлайға сиртеү **2.** *чем* и *без доп.* шартлатыу, шартлау, шыртлау, шылт итеү; **щёлкать языко́м** тел шартлатыу **3.** *кого*; *перен.*, *прост.* үлтереү, юҡ итеү; **щёлкать проти́вника** дошманды юҡ итеү **4.** *что* (*трескать с треском, хрустом*) ярыу, сиртеү; **щёлкать се́мечки** көнбағыш ярыу **5.** (*петь — о некоторых птицах*) сутылдау, һайрау; **недалеко́ щёлкали соловьи́** яҡында һандуғастар һайраны

♦ **щёлкать зуба́ми** асығыу; **щёлкать на счётах** счётта иҫәпләү, счёт һуғыу

**ЩЁЛКНУТЬ** *сов. см.* **щёлкать**

**ЩЁЛОК** *м* һелте иретмәһе

**ЩЕЛОЧНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*содержащий щёлочь*) һелтеле; **щелочна́я вода́** һелтеле һыу **2.** *хим.* (*образующий щёлочь*) һелте барлыҡҡа килтереүсе; **щелочны́е мета́ллы** һелте барлыҡҡа килтереүсе металдар **3.** (*действующий с помощью щёлочи*) һелте менән (ярҙамында); **щелочна́я очи́стка** һелте менән таҙартыу

**ЩЁЛОЧЬ** *ж*; *хим.* һелте

**ЩЕЛЧО́К** *м* **1.** сиртеү; **щелчо́к по́ лбу** маңлайға сиртеү **2.** (*резкий звук от удара, действия механизма и т.д.*) сыҡылдау, шаҡылдау; **щелчо́к выключа́теля** һүндергестең сыҡылдауы **3.** *перен.*, *разг.* (*оскорбление*) мыҫҡыл, мәсхәрә; **дать щелчо́к** мыҫҡыл итеү

**ЩЕЛЬ** *ж* **1.** ярыҡ, ек, тишек; **щель в полу́** иҙәндәге ярыҡ; **смотрова́я щель та́нка** танкының күҙәтеү тишеге **2.** *анат.* ек; **голосова́я щель** тауыш еге **3.** *воен.* (*убежище*) һаҡланыу (йәшеренеү) урыны, соҡор

**ЩЕМИ́ТЬ** *несов.* **1.** *безл.* ауыртыу, ҡыҫыу, әрнеү, һыҙлау, сәнсеү; **щеми́ло го́рло** тамаҡ ауырта ине; **щеми́т грудь** күкрәк ҡыҫа **2.** *что*; *перен.* әрнетеү, үҙәкте өҙөү, күңелде өйкәү; **что́-то щеми́т мне ду́шу** йөрәгемде нимәлер әрнетә

**ЩЕМЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **щеми́ть** **2.** *прил.* сәнсеп (һыҙлап, әрнеп) торған; **щемя́щая боль** һыҙлап торған ауыртыу

**ЩЕНИ́ТЬСЯ** *несов.* (*о собаке*) көсөкләү; (*о волчице, лисе и т.п.*) балалау

**ЩЕНО́К** *м* **1.** көсөк **2.** *прост.*, *бран.* көсөк, маңҡа малай

**ЩЕПА́** *ж* **1.** *см.* **ще́пка** **2.** *собир.* тап, юнысҡы; **двор зава́лен щепо́й** ишек алды тап менән тулған **3.** *собир.* (*дранка*) транса; **кро́вельная щепа́** өй башы яба торған транса

**ЩЕПА́ТЬ** *несов. что* ярыу, телеү; **щепа́ть лучи́ну** сыра телеү

**ЩЕПЕТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* (*мелочный*) ваҡсыл, сетерекле, соҡсоноусан; **щепети́льный челове́к** ваҡсыл кеше; **щепети́льный допро́с** сетерекле һорау алыу **2.** (*педантичный, строго принципиальный*) талапсан **3.** (*деликатный*) сетерекле, нәзәкәтле; **щепети́льное положе́ние** сетерекле хәл

**ЩЕ́ПКА** *ж* тап, тапсыҡ, юнысҡы, сыра; **разлете́ться в ще́пки** тапҡа әйләнеү

**ЩЕПО́ТКА** *ж см.* **щепо́ть**; **щепо́тка со́ли** бер семтем тоҙ

**ЩЕПО́ТЬ** и **ЩЕ́ПОТЬ** *ж* **1.** (*большой, средний и указательный пальцы, сложенные вместе*) семтем **2.** (*количество чего-л. сыпучего, взятого щепотью*) бер семтем; **щепо́ть табаку́** бер семтем тәмәке

**ЩЕРБА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о предмете*) суғырмаҡлы, ҡытырлы, ҡытырмаҡлы; **щерба́тая мостова́я** суғырмаҡлы юл **2.** *разг.* (*рябой — о лице*) шаҙра, быжыр; **щерба́тое лицо́** шаҙра бит

**ЩЕРБИ́НА** *ж* **1.** (*зазубрина*) китек, уйым, ҡытырмаҡ, суғырмаҡ; **дом в щерби́нах** суғырмаҡлы өй; **нож с щерби́нами** китек бысаҡ **2.** *разг.* (*рябинка на лице*) шаҙра, быжыр **3.** (*отверстие на месте выпавшего зуба*) теш ҡыуышлығы

**ЩЕ́РИТЬ** *несов. что*; *разг.* ыржайтыу; **ще́рить зу́бы** теш ыржайтыу

**ЩЕ́РИТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* (*скалить зубы*) ыржайыу, теш ыржайтыу **2.** *прост.* (*усмехаться*) көләмһерәү, йылмайыу

**ЩЕТИ́НА** *ж* **1.** ҡыл, шырт; **свина́я щети́на** сусҡа шырты **2.** *разг.* (*на подбородке, щеках*) шырт, төк; **лицо́, заро́сшее щети́ной** шырт ҡаплаған бит **3.** *перен.* (*что-л. жёсткое, торчащее*) шырт

**ЩЕТИ́НИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*покрытый густой щетиной*) шырт йөнлө (ҡыллы); **щети́нистая свинья́** шырт йөнлө сусҡа **2.** *разг.* (*густо заросший короткими, жёсткими волосами*) шырт, шырт баҫҡан, төклө; **щети́нистый подборо́док** шырт баҫҡан эйәк **3.** (*жёсткий — о волосах*) ҡаты, шырт, тырпай, тырпаҡ; **щети́нистые усы́** тырпай мыйыҡ

**ЩЕТИ́НИТЬ** *несов. что*; *разг.* йөнөн (һыртын) ҡабартыу; **медве́дь щети́нит шерсть** айыу йөнөн ҡабарта

**ЩЕТИ́НИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*топорщиться — о шерсти, щетине и т.п.*) йөнө (һырты) ҡабарыу, ҡабарыныу, тырпайыу; **усы́ щети́нились** мыйыҡтар тырпайған **2.** *разг.* (*поднимать торчком шерсть и т.п.*) йөнөн (һыртын, энәләрен) ҡабартыу; **ёж щети́ниться** терпе энәләрен ҡабарта **3.** *перен.*, *прост.* (*злиться, сердиться*) асыуланыу, ҡабарыныу

**ЩЕТИ́ННЫЙ,** -ая, -ое ҡыл ...ы; **щети́нная щётка** ҡыл щётка

**ЩЁТКА** *ж* **1.** щётка; **зубна́я щётка** теш щёткаһы **2.** (*пучок волос над копытом лошади*) сәсә

**ЩЁТОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** щётка ...ы; **щёточная коло́дка** щётка ҡалыбы **2.** щёткалы; **щёточная маши́на** щёткалы машина

**ЩЁЧНЫЙ,** -ая, -ое яңаҡ ...ы; **щёчные мы́шцы** яңаҡ мускулдары

**ЩИ** *только мн.* кәбеҫтә ашы, щи

**ЩИ́КОЛОТКА** *ж* шайтан ашығы, шайтанашыҡ; **вы́ше щи́колотки** шайтанашыҡтан юғары(раҡ)

**ЩИПА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* семтеү, суҡыу (*ҡош-ҡортҡа ҡарата*) **2.** *что* семеттереү, әсеттереү, көйҙөрөү, өтөү, яндырыу; (*о крапиве*) сағыу; **моро́з щипа́л у́ши** һыуыҡ ҡолаҡтарҙы семеттерҙе; **дым щипа́л глаза́** төтөн күҙҙәрҙе әсеттерҙе **3.** *что* бороу, сиртеү, тартыу; **щипа́ть усы́** мыйыҡтарҙы бороу; **щипа́ть стру́ны гита́ры** гитара ҡылдарын сиртеү **4.** *что* тетеү, һүреү; **щипа́ть моча́ло** йыуғыс тетеү **5.** *что* өҙөү, йолҡоу, йолҡоп ашау, семсенеү; **ко́ни щипа́ли траву́** аттар үлән

семсенеп йөрөйҙәр ине **6.** *кого-что* (*ощипывать*) йолҡоу; **щипа́ть ку́рицу** тауыҡ йолҡоу **7.** *что* (*отрывать, обрывать*) тетеү, тәрәшләү; **щипа́ть пеньку́** тарма сүсен тәрәшләү

**ЩИПА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **щипа́ть** 1; **2.** (*щипать друг друга*) семтешеү **3.** *страд. от* **щипа́ть** 3—7

**ЩИПКО́ВЫЙ: щипко́вые музыка́льные инструме́нты** *муз.* сиртмә ҡыллы музыка ҡоралдары

**ЩИПКО́М** *нареч.*; *муз.* сиртеп; **игра́ть на мандоли́не щипко́м** мандолина ҡылын сиртеп уйнау

**ЩИПНУ́ТЬ** *сов. см.* **щипа́ть** 1—3

**ЩИПО́К** *м см.* **щипа́ть — щипну́ть**

**ЩИПЦЫ́** *только мн.* (*инструмент, служащий для сжимания, схватывания чего-л.*) ҡарғаморон, ҡыҫҡыс; (*для выдёргивания чего-л.*) һурғыс, ҡарғаморон; (*для выщипывания бровей*) эҫкәк; (*для угля*) йәмкә; (*для раскалывания сахара*) шәкәр ватҡыс; (*для раскалывания орехов*) сәтләүек ярғыс

**ЩИ́ПЧИКИ** *только мн.*; *уменьш. от* **щипцы́**

**ЩИТ** *м* **1.** (*защитное вооружение*) ҡалҡан **2.** *перен.* (*защита*) һаҡ, ҡалҡан, кәртә; **быть щито́м** ҡалҡан булыу **3.** кәртә, ҡалҡан; **деревя́нные щиты́** ағас кәртәләр; **оруди́йный щит** туп ҡалҡаны **4.** *гидротех.* ҡапҡа **5.** (*стенд*) щит; **сигна́льный щит** сигнал биреү щиты **6.** *зоол.* ҡалҡан ♦ **подня́ть на щит** *кого-что* күккә күтәреү, маҡтау; **на щите́ верну́ться** *высок.* еңелеү, һәләк булыу; **со щито́м верну́ться** *высок.* еңеү

**ЩИТОВИ́ДНЫЙ: щитови́дная железа́** *анат.* ҡалҡан биҙ

**ЩИТО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **щит** 3, 5; **2.** *зоол.* (*пластинка у основания крыльев жука*) ҡалҡансыҡ **3.** *бот.* (*вид соцветия*) ҡалҡанса, туп баш гөл

**ЩУ́КА** *ж* суртан; (*молодая*) шүкә; (*щука средней величины*) сурағай

**ЩУП** *м* **1.** (*ручной бур*) бырау; **рабо́чий щуп** эш быраууы **2.** ҡапшауыс, ҡармауыс; **разве́дка мин щу́пом** миналарҙы ҡапшауыс менән эҙләү

**ЩУ́ПАЛЬЦА** *мн.* (*ед.* **щу́пальце** *с*) һәрмәүес (*ҡайһы бер бөжәктәрҙә һәм хайуандарҙа*); **щу́пальца осьмино́га** һигеҙаяҡ һәрмәүестәре

**ЩУ́ПАТЬ** *несов. кого-что* һәрмәү, ҡапшау, ҡармау, һәрмәп (ҡапшап, ҡармап) ҡарау; **щу́пать карма́ны** кеҫәләрҙе ҡапшап ҡарау; **щу́пать пульс** пульсты ҡапшап ҡарау ♦ **щу́пать глаза́ми (взо́ром)** *кого-что кемде-нимәне* иғтибар менән ҡараштырыу

**ЩУ́ПЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* ябыҡ, сибек, ҡураныс, хәлһеҙ, кәрһеҙ; **щу́плый челове́к** сибек кеше **2.** *с.-х.* ас; **щу́плое зерно́** ас орлоҡ

**ЩУР I** *м* ҡарағай турғайы

**ЩУР II** *м*; *миф.* ырыу башлығы (*славян мифологияһында*)

**ЩУ́РИТЬ** *несов. что* ҡыҫып ҡарау; **щу́рить глаза́** күҙҙәрҙе ҡыҫып ҡарау

**ЩУ́РИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*щурить глаза*) күҙҙе ҡыҫып ҡарау **2.** (*прикрываться — о глазах*) күҙ ҡыҫылыу

**ЩУ́ЧИЙ,** -ья, -ье суртан (сурағай, шүкә) ...ы; **щу́чья голова́** суртан башы ♦ **(как) по щу́чьему веле́нью** тылсым көсө менән

# Э

**Э** *межд.* э, э-э-э, эй; **э, да ты уезжа́ешь** э, һин китәһеңме ни; **э, нет, позво́льте уж я** э-э-э, юҡ инде мин үҙем; **э-э-э, жизнь** эй, ғүмер

**ЭБЕ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** эбен ағасы(ның) ...ы; **эбе́новая ветвь** эбен ағасының ботағы **2.** эбен ағасынан, эбен ағасынан эшләнгән (яһалған); **эбе́новая шкату́лка** эбен ағасынан ҡумта **3.** *в знач. сущ.* **эбе́новые** *мн.*; *бот.* эбен һымаҡтар ♦ **эбе́новое де́рево** эбен ағасы (*тропик илдәрҙә үҫә торған ҡиммәтле ағас*)

**ЭБОНИ́Т** *м* эбонит (*резина ҡушымталарынан алынған ҡаты ҡара материал*)

**ЭБОНИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** эбонит ...ы; **эбони́товая пыль** эбонит саңы **2.** эбонит; **эбони́товая про́бка** эбонит тығын; **эбони́товая тру́бка** эбонит көпшә

**ЭВАКУАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое эвакуация ...ы, эвакуациялау ...ы; **эвакуацио́нная коми́ссия** эвакуация комиссияһы; **эвакуацио́нные рабо́ты** эвакуация эштәре

**ЭВАКУА́ЦИЯ** *ж* эвакуация, эвакуациялау (*халыҡты, ҡаралтыларҙы һ.б. ҡурҡыныс янаған урындан хәүефһеҙ урынға ойошҡан рәүештә күсереү*); **быть в эвакуа́ции** эвакуацияла булыу; **гото́виться к эвакуа́ции** эвакуацияға әҙерләнеү; **эвакуа́ция заво́да** заводты эвакуациялау

**ЭВАКУИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **эвакуи́ровать 2.** *прил.* эвакуацияланған; **эвакуи́рованный заво́д** эвакуацияланған завод **3.** *в знач. сущ.* **эвакуи́рованный** *м* и **эвакуи́рованная** *ж* эвакуацияланған кеше

**ЭВАКУИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* эвакуациялау, күсереү; **эвакуи́ровать дете́й** балаларҙы эвакуациялау; **эвакуи́ровать в глубо́кий тыл** алыҫ тылға күсереү

**ЭВАКУИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* эвакуацияланыу, күсеү, күсерелеү; **необходи́мость эвакуи́роваться** эвакуацияланыу кәрәклеге **2.** *несов. страд. от* **эвакуи́ровать**

**ЭВЕ́НКИ** *мн.* эвенкылар, эвенк халҡы // *ед.* **эве́нк** *м* эвенк ир-аты; **эвенки́йка** *ж* эвенк ҡатын-ҡыҙы

**ЭВЕНКИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое эвенк ...ы; **эвенки́йский язы́к** эвенк теле

**ЭВЕ́НСКИЙ,** -ая, -ое эвен ...ы; **эве́нский язы́к** эвен теле

**ЭВЕНТУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* эвентуаль (*билдәле шарттарҙа мөмкин булған*); **эвентуа́льное сотру́дничество** эвентуаль хеҙмәттәшлек

**ЭВЕ́НЫ** *мн.* эвендар, эвен халҡы // *ед.* **эве́н** *м* эвен ир-аты; **эве́нка** *ж* эвен ҡатын-ҡыҙы

**ЭВКАЛИ́ПТ** *м* эвкалипт (*ағас*)

**ЭВКАЛИ́ПТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** эвкалипт ...ы; **эвкали́птовый лес** эвкалипт урманы **2.** эвкалипт ...ы, эвкалипттан алынған; **эвкали́птовое ма́сло** эвкалипт майы

**ЭВКО́ММИЯ** *ж* эвкоммия (*көньяҡ ағасы*)

**ЭВОЛЮЦИОНИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* эволюция (үҫеш, үҙгәреш) кисереү

**ЭВОЛЮЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое эволюцион, эволюция ...ы, үҫеш (үҙгәреш) ...ы; **эволюцио́нный проце́сс** үҫеш процесы; **эволюцио́нная тео́рия** эволюция теорияһы; **эволюцио́нное уче́ние** эволюцион тәғлимәт

**ЭВОЛЮ́ЦИЯ** *ж* **1.** эволюция, үҙгәреш, үҫеш; **эволю́ция челове́ка** кеше эволюцияһы; **эволю́ция Вселе́нной** Ғаләм үҙгәреше; **эволю́ция иску́сства** сәнғәт үҫеше **2.** *филос.* эволюция (*тәбиғәттең һәм йәмғиәттең һан, күләм яғынан үҙгәрешенең сифат үҙгәреүенә килтергән үҫеш процесы*)

**Э́ВРИКА** *межд.* эврика, таптым, булды (*ҡыуаныуҙы белдергәндә*)

**ЭВРИ́СТИКА** *ж* эвристика (*тикшеренеүҙәге алымдар системаһы һәм теория*)

**ЭВРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эвристик; **эвристи́ческий приём** эвристик алым

**ЭВФЕМИ́ЗМ** *м*; *книжн.* эвфемизм (*тупаҫыраҡ һүҙ урынына ҡулланылған әҙәпле һүҙ*)

**ЭВФЕМИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эвфемистик; **эвфемисти́ческое выраже́ние** эвфемистик әйтем

**ЭВФОНИ́Я** *ж* **1.** *книжн.*, *уст.* (*благозвучие*) аһәң; **эвфони́я кура́я** ҡурай аһәңе **2.** *лингв.*, *лит.* эвфония (*шиғри әҫәрҙә өн-ауаз ярашлығы*; *поэтикала әҫәрҙең өн яғынан төҙөлөшөн тикшереү бүлеге*)

**ЭГЕ́** и **Э-ГЕ-ГЕ́** *межд.* әһә; **эге́, попа́лся!** әһә, эләктеңме!

**ЭГИ́ДА: под эги́дой** *чьей* (*книжн.*) *кемдеңдер* яҡлауында, ҡанаты аҫтында

**ЭГОИ́ЗМ** *м* эгоизм, мин-минлек, үҙемселек; **чу́вство эгои́зма** мин-минлек хисе

**ЭГОИ́СТ** *м* и **ЭГОИ́СТКА** *ж* эгоист, үҙемсе, мин-минлекле кеше; **быть эгои́стом** үҙемсе булыу

**ЭГОИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*проникнутый эгоизмом*) эгоистик, мин-минле, үҙемселекле; **эгоисти́ческая цель** эгоистик маҡсат; **эгоисти́ческий посту́пок** үҙемселекле ҡылыҡ **2.** үҙемсе ...ы, мин-минлек ...ы; **эгоисти́ческое чу́вство** мин-минлек хисе; **эгоисти́ческая черта́** үҙемсе һыҙаты

**ЭГОИСТИ́ЧНОСТЬ** *ж* эгоислыҡ, мин-минлелек, үҙемселек

**ЭГОИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **эгоисти́ческий**

**ЭГОТИ́ЗМ** *м*; *книжн.* эготизм (*үҙең тураһында юғары фекерҙә булыу, үҙеңә ғашиҡлыҡ*)

**ЭГОЦЕНТРИ́ЗМ** *м*; *книжн.* эгоцентризм (*үҙеңде ғаләм үҙәге итеп тойоу, башҡалар менән бөтөнләй иҫәпләшмәү*)

**ЭГРЕ́Т** *м* и **ЭГРЕ́ТКА** *ж* эгрет, эгретка (*ҡатын-ҡыҙҙың баш кейемен йәки сәсен биҙәгән ҡауырһын*)

**ЭДЕЛЬВЕ́ЙС** *м* эдельвейс (*тау сәскәһе*)

**ЭДЕ́М** *м* ожмах, йәннәт

**ЭДИ́КТ** *м*; *ист.* эдикт (**1.** *Боронғо Римда вазифа ҡабул иткәндә юғары хакимиәт белдереүе* **2.** *урта быуаттарҙа хакимиәт фарманы*)

**ЭЖЕ́КТОР** *м* эжектор (*пар йәки һауа ҡыҫымы менән эшләй торған насос*)

**ЭЗО́ПОВ: эзо́пов язы́к** Эзоп теле (*фекерҙе ситләтеп, кинәйә менән әйтеү*)

**ЭЗО́ПОВСКИЙ,** -ая, -ое кинәйәле, йәшерен, ситләтелгән; **эзо́повский стиль** йәшерен стиль

**ЭЙ** *межд.* эй, эй; **эй, кто там?** эй, кем унда?; **эй, смотри́, не забу́дь** эй, ҡара уны, онотма

**ЭЙФОРИ́Я** *ж*; *мед.* эйфория (*тәбиғи булмаған, нигеҙһеҙ күтәренке кәйеф*); **находи́ться в состоя́нии эйфори́и** эйфория хәлендә булыу

**ЭКВАДО́РСКИЙ,** -ая, -ое Эквадор ...ы; **эквадо́рская сторона́** Эквадор яғы

**ЭКВАДО́РЦЫ** *мн.* эквадорлылар, Эквадор халҡы // *ед.* **эквадо́рец** *м* Эквадор ир-аты; **эквадо́рка** *ж* Эквадор ҡатын-ҡыҙы

**ЭКВА́ТОР** *м*; *геогр.* экватор ♦ **магни́тный эква́тор** *см.* **магни́тный**; **небе́сный эква́тор** *астр.* күк экваторы; **эква́тор хруста́лика** *мед.* күҙ яҫмығы экваторы

**ЭКВАТОРИА́Л** *м* экваториал (*астрономик телескоп*)

**ЭКВАТОРИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *геогр.* экватор ...ы; **экваториа́льный круг** экватор түңәрәге; **экваториа́льный ве́тер** экватор еле; **экваториа́льные стра́ны** экватор илдәре ♦ **экваториа́льная ра́са** *антроп.* экваториаль раса (*Африка, Көньяҡ Азия һәм Көньяҡ-Көнсығыш Азия, Океания, Австралия илдәрендә таралған раса*)

**ЭКВИВАЛЕ́НТ** *м* эквивалент; **механи́ческий эквивале́нт теплоты́** йылылыҡтың механик эквиваленты; **това́рный эквивале́нт** тауар эквиваленты

**ЭКВИВАЛЕ́НТНОСТЬ** *ж* эквивалентлыҡ, тап килеү, тиңлек; **това́рная эквивале́нтность** тауар эквивалентлығы

**ЭКВИВАЛЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое эквивалент, тиң булған, тиңдәш; **эквивале́нтная величина́** эквивалент дәүмәл; **эквивале́нтные уравне́ния** эквивалент тигеҙләмәләр; **эквивале́нтный обме́н** тиң булған алмашыу

**ЭКВИЛИБРИ́РОВАТЬ** *несов.* эквилибристика менән шөғөлләнеү

**ЭКВИЛИБРИ́СТ** *м* и **ЭКВИЛИБРИ́СТКА** *ж* эквилибрист (*цирк артисы*)

**ЭКВИЛИБРИ́СТИКА** *ж* эквилибристика (*тигеҙлекте юғалтмай ҡатмарлы хәрәкәттәр яһау оҫталығы*); **чудеса́ эквилибри́стики** эквилибристика мөғжизәләре

**ЭКВИЛИБРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эквилибристик; **эквилибристи́ческий но́мер** эквилибристик номер

**ЭКЗАЛЬТА́ЦИЯ** *ж* (артыҡ) ярһыу (тәьҫирләнеү, шатланыу), ҡыуаныу; **ю́ношеская экзальта́ция** йәшлек ярһыуы

**ЭКЗАЛЬТИРО́ВАННОСТЬ** и **ЭКЗАЛЬТИ́РОВАННОСТЬ** *ж* (артыҡ) ярһыулыҡ (тәьҫирләнеүсәнлек)

**ЭКЗАЛЬТИРО́ВАННЫЙ** и **ЭКЗАЛЬТИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое ҡыуаныс (шатлыҡ) менән тулы, (артыҡ) ярһыулы (тәьҫирләнгән); **экзальтиро́ванный взгляд** ярһыулы ҡараш; **экзальтиро́ванный челове́к** артыҡ тәьҫирләнгән кеше

**ЭКЗА́МЕН** *м*; *прям.*, *перен.* һынау, имтихан, экзамен; **вы́держать экза́мен** һынау үтеү; **держа́ть экза́мен на выно́сливость** сыҙамлыҡҡа һынау тотоу; **сдава́ть экза́мен** һынау биреү; **сдать выпускны́е экза́мены** сығарылыш имтихандары тапшырыу

**ЭКЗАМЕНА́ТОР** *м* һынау (имтихан, экзамен) алыусы

**ЭКЗАМЕНА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое һынау (имтихан, экзамен) алыусы ...ы; **экзамена́торская по́дпись** имтихан алыусының ҡултамғаһы; **экзамена́торские обя́занности** һынау алыусының бурыстары

**ЭКЗАМЕНАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое һынау (имтихан, экзамен) ...ы; **экзаменацио́нный биле́т** имтихан билеты

**ЭКЗАМЕНОВА́ТЬ** *несов. кого-что* һынау (имтихан, экзамен) алыу (үткәреү); **экзаменова́ть студе́нтов** студенттарға һынау үткәреү; **экзаменова́ть по исто́рии** тарихтан имтихан алыу

**ЭКЗАМЕНОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һынау (имтихан, экзамен) биреү (тотоу, үтеү, тапшырыу); **экзаменова́ться по матема́тике** математиканан һынау биреү **2.** *страд. от* **экзаменова́ть**

**ЭКЗЕКУ́ТОР** *м* **1.** экзекутор (*батша Рәсәйендә хужалыҡ эштәрен алып барыусы чиновник*) **2.** *уст.* тән язаһы биреүсе, язалаусы

**ЭКЗЕКУ́ЦИЯ** *ж*; *уст.* **1.** тән язаһы; **подверга́ть экзеку́ции** тән язаһына дусар итеү **2.** (*исполнение судебного или административного приговора*) хөкөм ҡарарын башҡарыу (үтәү); **вре́мя экзеку́ции** хөкөм ҡарарын үтәү ваҡыты

**ЭКЗЕ́МА** *ж* экзема, ҡамасау (*тире ауырыуы*)

**ЭКЗЕМПЛЯ́Р** *м* **1.** дана, экземпляр; **напеча́тать в трёх экземпля́рах** өс экземплярҙа баҫыу **2.** *кого-чего* өлгө, төр, үрнәк; **ре́дкий экземпля́р цветка́** сәскәнең һирәк осрай торған төрө **3.** *кого-чего* вәкил; **типи́чный экземпля́р холосто́го мужчи́ны** буйҙаҡ ир-аттарҙың типик вәкиле

**ЭКЗИСТЕНЦИАЛИ́ЗМ** *м* экзистенциализм (*XX б. барлыҡҡа килеп, шәхестең йәшәүен, уның ижадын, ирекле һәм яуаплы булыуын төп төшөнсәләр итеп таныған фәлсәфәүи ағым*)

**ЭКЗО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "тыш", "сит", "ят" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **экзога́мия** экзогамия

**ЭКЗОГА́МИЯ** *ж*; *этн.* экзогамия (*бер ырыу эсендә үҙ-ара өйләнешеүҙе тыйған йола*); **явле́ние экзога́мии** экзогамия күренеше

**ЭКЗОГА́МНЫЙ,** -ая, -ое *этн.* экзогам; **экзога́мный род** экзогам ырыу

**ЭКЗОГЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* экзоген (*тышҡы сәбәптәр тәьҫирендә үҙгәрә торған*); **экзоге́нные измене́ния** *геол.* экзоген үҙгәрештәр

**ЭКЗОТЕРМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *хим.* экзотермик (*йылылыҡ сығара торған*); **экзотерми́ческие реа́кции** экзотермик реакциялар

**ЭКЗО́ТИКА** *ж* экзотика, сит (ят) үҙенсәлек; **экзо́тика Восто́ка** Көнсығыш экзотикаһы

**ЭКЗОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** экзотик, сит, ят; **экзоти́ческие расте́ния** ят үҫемлектәр; **экзоти́ческие стра́ны** экзотик илдәр **2.** *перен.* (*диковинный*) экзотик, сәйер, хикмәтле, ғәжәп, ҡыҙыҡ; **экзоти́ческий та́нец** хикмәтле бейеү

**ЭКЗОТИ́ЧНОСТЬ** *ж* экзотиклыҡ, сәйерлек; **экзоти́чность явле́ния** күренештең экзотиклығы

**ЭКЗОТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **экзоти́ческий**

**ЭКИВО́КИ** *мн.* (*ед.* **экиво́к** *м*) ишара, кинәйә, ситләтеп (ике мәғәнәле) һөйләү; **говори́ть с экиво́ками** кинәйә менән һөйләү

**ЭКИПА́Ж I** *м* экипаж (*рессорлы арба*); **сади́ться в экипа́ж** экипажға ултырыу

**ЭКИПА́Ж II** *м* экипаж; **экипа́ж корабля́** карабль экипажы; **комплектова́ть экипа́ж** экипаж туплау (комплектлау); **фло́тский экипа́ж** флот экипажы

**ЭКИПИРОВА́ТЬ** *сов.*, *несов.* **1.** *кого-что* (кәрәк-яраҡ менән) тәьмин итеү; **экипирова́ть войска́** ғәскәрҙе кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү **2.** *разг.* (*снабдить одеждой и обувью*) кейендереү, кейем-һалым менән тәьмин итеү **3.** *ж.-д.* яңы рейсҡа (юлға) әҙерләү; **экипирова́ть ваго́ны** вагондарҙы яңы рейсҡа әҙерләү

**ЭКИПИРОВА́ТЬСЯ** **1.** *сов.*, *несов.* (кәрәк-яраҡ менән) тәьмин ителеү **2.** *сов.*, *несов.*; *разг.* кейенеү, кейем-һалым менән тәьмин ителеү **3.** *несов. страд. от* **экипирова́ть**

**ЭКИПИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **экипирова́ть**, **экипирова́ться**; **экипиро́вка батальо́на** батальонды кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү **2.** (*снаряжение*) кәрәк-яраҡ, ҡорал-ҡорамал; **казённая экипиро́вка** ҡаҙна кәрәк-ярағы **3.** (*одежда и обувь*) кейем-һалым

**ЭКИПИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *ж.-д.* юлға (яңы рейсҡа) әҙерләү ...ы; **экипиро́вочное депо́** юлға әҙерләү депоһы

**ЭКЛЕКТИ́ЗМ** *м* эклектизм (**1.** *төрлө идея йүнәлештәрен, теорияларҙы, караштарҙы принципһыҙ ҡушыу* **2.** *архит., сәнғ. төрлө стиль үҙенсәлектәрен ҡушыу, художестволы принциптар берҙәмлеге булмау*); **идеологи́ческий эклекти́зм** идеологик эклектизм

**ЭКЛЕ́КТИК** *м* эклектик (*эклектизм яҡлы кеше*)

**ЭКЛЕ́КТИКА** *ж* эклектика (*эклектизм йөкмәткеле хәл-күренеш*)

**ЭКЛЕКТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эклектик, әҙмә-әҙләкһеҙ; **эклекти́ческая филосо́фия** эклектик фәлсәфә; **эклекти́ческие сужде́ния** әҙмә-әҙләкһеҙ фекерҙәр

**ЭКЛЕКТИ́ЧНОСТЬ** *ж* эклектиклыҡ, әҙмә-әҙләкһеҙлек; **эклекти́чность вы́водов** һығымталарҙың әҙмә-әҙләкһеҙлеге

**ЭКЛЕКТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **эклекти́ческий**

**ЭКЛЕ́Р** *м* эклер (*кремлы пирог төрө*)

**ЭКЛИ́МЕТР** *м* эклиметр (*вертикаль яҫылыҡтағы мөйөштәрҙе үлсәү ҡоралы*)

**ЭКЛИ́ПТИКА** *ж*; *астр.* эклиптика (*бер йыл эсендә Ҡояш хәрәкәт иткән күк түңәрәге*)

**ЭКЛИПТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *астр.* эклиптик, эклиптика ...ы; **эклипти́ческая пло́скость** эклиптик яҫылыҡ

**ЭКЛО́ГА** *ж*; *лит.* эклога (*шиғыр төрө*)

**ЭКОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое экологик, экология ...ы; **экологи́ческая пробле́ма** экология мәсьәләһе; **экологи́ческая катастро́фа** экологик һәләкәт ♦ **экологи́ческая систе́ма** экологик берҙәмлек, тереклек системаһы (*үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһын йәшәгән урыны менән бәйләп өйрәнеү*)

**ЭКОЛО́ГИЯ** *ж* экология (*тереклектең тирә-яҡ мөхит менән бәйләнешен өйрәнеүсе фән*); **эколо́гия расте́ний** үҫемлектәр экологияһы

**ЭКОНОМ...** *урыҫ телендә ҡушма һүҙҙәрҙең "иҡтисад", "иҡтисади" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **экономотде́л** иҡтисад бүлеге

**ЭКОНО́МИКА** *ж*; *в разн. знач.* иҡтисад, экономика; **эконо́мика капитали́зма** капитализм иҡтисады; **эконо́мика страны́** ил экономикаһы; **эконо́мика се́льского хозя́йства** ауыл хужалығы иҡтисады; **институ́т эконо́мики** иҡтисад институты; **ле́кции по эконо́мике** иҡтисад буйынса лекциялар

**ЭКОНОМИ́СТ** *м* экономист (*иҡтисад белгесе*); **подгото́вка экономи́стов** экономистар әҙерләү; **рабо́тать экономи́стом** экономист булып эшләү

**ЭКОНО́МИТЬ** *несов.* **1.** *что* экономиялау, һаҡсыл (һаҡлап, бәрәкәтле) тотоноу, әрәмләмәү, әрәм-шәрәм итмәү; **эконо́мить во́ду** һыуҙы һаҡсыл тотоноу; **эконо́мить де́ньги** аҡсаны бәрәкәтле тотоноу **2.** *в чём, на чём* экономия яһау, әҙ (ҡыҫып) тотоноу, файҙа итеү, экономиялау; **эконо́мить на еде́** ашауҙы ҡыҫыу

**ЭКОНО́МИТЬСЯ** *несов.* **1.** тотонолмай ҡалыу, экономиялау **2.** *страд. от* **эконо́мить** 1

**ЭКОНОМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое иҡтисади, экономик, экономика ...ы; **экономи́ческая поли́тика** иҡтисади сәйәсәт; **экономи́ческое сотру́дничество** экономик хеҙмәттәшлек; **экономи́ческие зако́ны** иҡтисад ҡанундары; **экономи́ческие тре́бования** иҡтисади талаптар ♦ **экономи́ческая геогра́фия** иҡтисад географияһы

**ЭКОНОМИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** бәрәкәтлелек, файҙалы (төтөмлө) булыу; **экономи́чность кра́ски** буяуҙың бәрәкәтлелеге **2.** аҙ сығымлы булыу, файҙалылыҡ, отошлолоҡ; **экономи́чность ме́тода произво́дства** етештереү ысулының отошлолоғо

**ЭКОНОМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бәрәкәтле, файҙалы, төтөмлө; **экономи́чное испо́льзование** бәрәкәтле ҡулланыу; **экономи́чный раство́р** бәрәкәтле иҙмә **2.** файҙалы, аҙ сығымлы, отошло; **экономи́чный спо́соб обрабо́тки де́рева** ағас эшкәртеүҙең аҙ сығымлы ысулы

**ЭКОНО́МИЯ** *ж* **1.** экономия, һаҡлыҡ, исраф итмәү, һаҡлау; **научи́ться эконо́мии** һаҡлыҡҡа өйрәнеү **2.** экономия, табыш, файҙа; **больша́я эконо́мия** ҙур файҙа ♦ **полити́ческая эконо́мия** сәйәси экономия

**ЭКОНО́МКА** *ж*; *уст.* экономка (*хужалыҡты алып барған ҡатын-ҡыҙ*)

**ЭКОНО́МНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* бәрәкәтле итеү, һаҡсыл булыу, ҡыҫып (һаҡлыҡ менән) тотоноу

**ЭКОНО́МНОСТЬ** *ж* бәрәкәтлелек, һаҡсыллыҡ; **эконо́мность в расхо́довании де́нег** аҡса тотоноуҙа һаҡсыллыҡ

**ЭКОНО́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һаҡсыл, йыйнаҡ, самалы, иҫәпсел, иҫәпләп тотоноусан; **эконо́мный хозя́ин** һаҡсыл хужа; **эконо́мное расхо́дование** иҫәпләп тотоноу **2.** (*сдержанный*) һаран; **эконо́мный в слова́х** һүҙгә һаран **3.** экономиялы, бәрәкәтле, аҙ сығымлы; **эконо́мный о́браз жи́зни** аҙ сығымдар менән йәшәү

**ЭКРА́Н** *м* **1.** *тех., физ.* экран; **экра́н телеви́зора** телевизор экраны; **экра́н со́лнечной батаре́и** ҡояш батареяһы экраны **2.** *перен.* экран, кино сәнғәте; **та́йны экра́на** кино сәнғәте серҙәре ♦ **голубо́й экра́н** *см.* **голубо́й**; **широ́кий экра́н** *см.* **широ́кий**

**ЭКРАНИЗА́ЦИЯ** *ж* экранлаштырыу; **экраниза́ция рома́на** романды экранлаштырыу; **проце́сс экраниза́ции** экранлаштырыу барышы

**ЭКРАНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* экранлаштырыу; **экранизи́ровать пье́су** пьесаны экранлаштырыу

**ЭКРАНИЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **экранизи́ровать**

**ЭКРАНИ́РОВАНИЕ** *с*; *тех.* экран ҡороу, экранлау, ышыҡлау, ҡаплау; **экрани́рование реа́ктора** реакторҙы ҡаплау; **экрани́рование прибо́ров** приборҙарҙы ышыҡлау

**ЭКРАНИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **экрани́ровать 2.** *прил.* экран ҡуйылған, экран-

ланған, ҡапланған, ышыҡланған; **экрани́рованный ка́бель** ҡапланған кабель

**ЭКРАНИ́РОВАТЬ** *сов., несов.; тех.* экран ҡороу, экранлау, ышыҡлау, һаҡлау

**ЭКРАНИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **экрани́ровать**

**ЭКРА́ННЫЙ,** -ая, -ое экран ...ы; **экра́нная ра́ма** экран рамы; **экра́нное иску́сство** экран сәнғәте

**ЭКС...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "элекке" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **экс-мини́стр** экс-министр; **экс-чемпио́н** экс-чемпион, элекке чемпион

**ЭКСКАВА́ТОР** *м* экскаватор; **гу́сеничный экскава́тор** сылбыр тәгәрмәсле экскаватор

**ЭКСКАВА́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое экскаватор ...ы; **экскава́торная стрела́** экскаватор уғы

**ЭКСКАВА́ТОРЩИК** *м* экскаваторсы; **рабо́тать экскава́торщиком** экскаваторсы булып эшләү

**ЭКСКРЕМЕ́НТЫ** *мн.; спец.* бүлендектәр (*тиҙәк, һейҙек*)

**Э́КСКУРС** и *уст.* **ЭКСКУ́РС** *м* экскурс, күҙ ташлау; **э́кскурс в о́бласть филосо́фии** фәлсәфәгә экскурс

**ЭКСКУРСА́НТ** *м* и **ЭКСКУРСА́НТКА** *ж* экскурсияла ҡатнашыусы, экскурсант; **гру́ппа экскурса́нтов** экскурсияла ҡатнашыусылар төркөмө

**ЭКСКУРСИО́ННЫЙ,** -ая, -ое экскурсия ...ы, **экскурсио́нный сезо́н** экскурсия сезоны; **экскурсио́нный авто́бус** экскурсия автобусы

**ЭКСКУ́РСИЯ** *ж; в разн. знач.* экскурсия; **экску́рсия шко́льников** уҡыусылар экскурсияһы; **организова́ть экску́рсию** экскурсия ойоштороу

**ЭКСКУРСОВО́Д** *м* экскурсовод (*экскурсия етәксеһе*)

**ЭКСКУРСОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое экскурсовод ...ы; **экскурсово́дческие обя́занности** экскурсовод бурыстары

**ЭКСЛИ́БРИС** *м* экслибрис (*китап тышлығының эске яғында хужаһының исемен күрһәткән тамға*)

**ЭКСПАНСИ́ВНОСТЬ** *ж* ҡыҙыулыҡ, үҙен тыя алмағанлыҡ, тотанаҡһыҙлыҡ

**ЭКСПАНСИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое экспансив, тотанаҡһыҙ, үҙен (тойғоларын) тыймаған, ҡыҙыу; **экспанси́вная нату́ра** экспансив холоҡ

**ЭКСПА́НСИЯ** *ж* **1.** экспансия, баҫҡынсылыҡ; **полити́ческая экспа́нсия** сәйәси экспансия **2.** экспансия, таралыу, баҫыу; **экспа́нсия эпиде́мии** эпидемияның таралыуы

**ЭКСПАТРИА́НТ** *м* и **ЭКСПАТРИА́НТКА** *ж* экспатриант (*илдән ҡыуылыу йәки үҙе теләп киткән кеше*)

**ЭКСПАТРИА́ЦИЯ** *ж* экспатриация (**1.** *тыуған илдән китеү йәки ҡыуылыу* **2.** *граждандылыҡтан баш тартыу йәки мәхрүм ителеү*)

**ЭКСПАТРИИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* экспатриациялау (*тыуған илдән ҡыуылыу*)

**ЭКСПАТРИИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* экспатриацияланыу (*башҡа илгә күсеү*) **2.** *несов. страд. от* **экспатрии́ровать**

**ЭКСПЕДИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что; спец.* оҙатыу, ебәреү; **экспеди́ровать корреспонде́нцию** корреспонденция оҙатыу; **экспеди́ровать груз** йөк ебәреү

**ЭКСПЕДИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **экспеди́ровать**

**ЭКСПЕДИ́ТОР** *м* экспедитор (*экспедиция менән шөғөлләнгән хеҙмәткәр*)

**ЭКСПЕДИ́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое экспедитор ...ы; **экспеди́торская рабо́та** экспедитор эше

**ЭКСПЕДИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** оҙатыу ...ы, ебәреү ...ы; **экспедицио́нный отде́л** оҙатыу бүлеге; **экспедицио́нное помеще́ние** оҙатыу урыны **2.** экспедиция ...ы; **экспедицио́нное снаряже́ние** экспедиция кәрәк-ярағы

**ЭКСПЕДИ́ЦИЯ** *ж* **1.** *спец.* оҙатыу, ебәреү; **экспеди́ция гру́зов** йөктәр ебәреү; **экспеди́ция газе́т** гәзит оҙатыу; **экспеди́ция официа́льных бума́г** рәсми ҡағыҙҙар оҙатыу **2.** (*отдел учреждения, занимающийся отправкой, рассылкой чего-л.*) оҙатыу, экспедиция **3.** *в разн. знач.* экспедиция; **нау́чная экспеди́ция** фәнни экспедиция; **спаса́тельная экспеди́ция** ҡотҡарыу экспедицияһы; **отпра́виться в экспеди́цию** экспедицияға китеү; **собра́ть экспеди́цию** экспедиция йыйыу

**ЭКСПЕРИМЕ́НТ** *м* эксперимент, тәжрибә, һынау; **сме́лый экспериме́нт** ҡыйыу тәжрибә; **бессмы́сленные экспериме́нты** мәғәнәһеҙ һынауҙар

**ЭКСПЕРИМЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** эксперименталь, эксперимент ...ы, тәжрибә ...ы; **эксперимента́льные да́нные** эксперимент мәғлүмәттәре **2.** эксперимент (тәжрибә) үткәреү ...ы; **эксперимента́льный отде́л** тәжрибә үткәреү бүлеге; **эксперимента́льные живо́тные** тәжрибә үткәреү хайуандары **3.** эксперименталь; **эксперимента́льный комба́йн** эксперименталь комбайн **4.** эксперименталь, тәжрибәгә нигеҙләнгән; **эксперимента́льная медици́на** эксперименталь медицина

**ЭКСПЕРИМЕНТА́ТОР** *м* экспериментсы; **изве́стный эксперимента́тор** танылған экспериментсы

**ЭКСПЕРИМЕНТА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое экспериментсы ...ы; **эксперимента́торский тала́нт** экспериментсы таланты

**ЭКСПЕРИМЕНТА́ТОРСТВО** *с* **1.** (*проведение экспериментов*) эксперимент яһау, тәжрибә үткәреү **2.** (*склонность к экспериментированию*) эксперимент үткәреүгә әүәҫлек

**ЭКСПЕРИМЕНТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **эксперименти́ровать**

**ЭКСПЕРИМЕНТИ́РОВАТЬ** *несов.* эксперимент (тәжрибә) яһау (үткәреү); **эксперименти́ровать с живо́тными** хайуандар менән тәжрибә үткәреү

**ЭКСПЕ́РТ** *м; в разн. знач.* эксперт; **экспе́рт вы́ставки** күргәҙмә эксперты; **заключе́ние экспе́ртов** эксперттар һығымтаһы

**ЭКСПЕРТИ́ЗА** *ж* экспертиза, тикшереү, ҡарау; **медици́нская эксперти́за** медицина экспертизаһы; **нау́чная экспертиза** ғилми экспертиза, фәнни тикшереү; **отпра́вить на экспертизу** экспертизаға ебәреү; **повто́рная экспертиза** ҡайтанан тикшереү

**ЭКСПЕ́РТНЫЙ,** -ая, -ое эксперт(тар) ...ы; **экспе́ртная коми́ссия** эксперт комиссияһы; **экспе́ртное заключе́ние** эксперттар һығымтаһы

**ЭКСПИРАТО́РНЫЙ,** -ая, -ое экспираторлы; **экспирато́рное ударе́ние** экспираторлы баҫым

**ЭКСПИРА́ЦИЯ** *ж*; *спец.* (*выдох*) экспирация (*һулыш* (*тын*) *сығарыу*)

**ЭКСПЛАНТА́ЦИЯ** *ж*; *биол.* эксплантация, эксплантациялау (*күсереп ултыртыу*); **эксплана́ция тка́ней органи́зма** организмдың туҡымаларын эксплантациялау

**ЭКСПЛУАТА́ТОР** *м* эксплуататор, эксплуатациялаусы, иҙеүсе

**ЭКСПЛУАТА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое эксплуататор(ҙар) ...ы, иҙеүсе(ләр) ...ы; **эксплуата́торский класс** эксплуататорҙар синыфы

**ЭКСПЛУАТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое файҙаланыу ...ы, эксплуатация ...ы; **эксплуатацио́нные изде́ржки** эксплуатация сығымдары

**ЭКСПЛУАТА́ЦИЯ** *ж* **1.** (*присвоение результатов чужого труда*) эксплуатация, эксплуатациялау, иҙеү **2.** (*использование, применение чего-л.*) файҙаланыу, тотоноу, эксплуатация; **эксплуата́ция маши́ны** машинаны файҙаланыу; **сдать в эксплуата́цию** файҙаланыуға тапшырыу

**ЭКСПЛУАТИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* **1.** эксплуатациялау, иҙеү; **эксплуати́ровать трудя́щихся** хеҙмәтсәндәрҙе иҙеү **2.** *что* файҙаланыу, тотоноу, эксплуатациялау; **эксплуати́ровать обору́дование** ҡорамалдарҙы файҙаланыу

**ЭКСПЛУАТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **эксплуати́ровать**

**ЭКСПОЗИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *лит., муз.* экспозицион, инеш; **экспозицио́нная часть рома́на** романдың инеш өлөшө **2.** күргәҙмә(ләр) ...ы, экспозиция(лар) ...ы; **экспозицио́нный зал** экспозициялар залы

**ЭКСПОЗИ́ЦИЯ** *ж* **1.** *лит., муз.* экспозиция, инеш, кереш; **экспози́ция траге́дии** трагедияның инеше **2.** (*показ*) экспозиция, ҡуйылыу, күргәҙмә **3.** (*выставленные вещи*) экспозиция, күргәҙмә; **музе́йная экспози́ция** музей экспозицияһы **4.** *фото., кино.* экспозиция, яҡтыртып алыу (төшөрөү); **дли́тельная экспози́ция** оҙаҡ яҡтыртып төшөрөү

**ЭКСПОНА́Т** *м* экспонат; **вы́ставочный экспона́т** күргәҙмә экспонаты

**ЭКСПОНА́ТНЫЙ,** -ая, -ое экспонат ...ы (*экспонатҡа ҡуйыла торған*); **экспона́тный экземпля́р** экспонат үрнәге

**ЭКСПОНЕ́НТ** *м* экспонент (*экспонат ҡуйыусы*)

**ЭКСПОНИ́РОВАНИЕ** *с см.* **экспони́ровать**

**ЭКСПОНИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** *кого-что* күргәҙмәгә ҡуйыу **2.** *что*; *фото.* яҡтыртыу, яҡты төшөрөү **3.** *что*; *шахм.* һөжүм аҫтына ҡуйыу

**ЭКСПОНИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **экспони́ровать**

**ЭКСПОНО́МЕТР** *м*; *фото., кино.* экспонометр

**Э́КСПОРТ** *м* экспорт (**1.** *сит илгә сығарыу* **2.** *сит илгә сығарылған тауар миҡдары һәм тауар үҙе*); **э́кспорт не́фти** нефть экспорты

**ЭКСПОРТЁР** *м* экспортёр (*сит илгә сығарыусы*)

**ЭКСПОРТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **экспорти́ровать**

**ЭКСПОРТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* экспортлау (*сит илгә сығарыу*); **экспорти́ровать това́р** тауарҙы экспортлау; **экспорти́ровать газ** газды экспортлау

**ЭКСПОРТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **экспорти́ровать**

**Э́КСПОРТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** экспорт ...ы; **э́кспортные опера́ции** экспорт эштәре **2.** сит илгә сығарыу (ебәреү) ...ы, сит илгә сығара (ебәрә) торған; **э́кспортный лес** сит илгә сығара торған ағас

**ЭКСПРЕ́СС** *м* экспресс (*тиҙ йөрөшлө автобус, пароход, поезд һ.б.*)

**ЭКСПРЕССИ́ВНОСТЬ** *ж* экспрессивлыҡ, тәьҫирлелек; **экспресси́вность ре́чи** телмәрҙең тәьҫирлелеге

**ЭКСПРЕССИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое экспрессив, йәнле, тәьҫирле, тасуири; **экспресси́вный жест** йәнле ишара; **экспресси́вная речь** тасуири телмәр

**ЭКСПРЕССИОНИ́ЗМ** *м* экспрессионизм (*XX б. башында сәнғәттә, әҙәбиәттә кешенең эске донъяһын, кисерештәрен ысынбарлыҡ тип ҡараған һәм уны сағылдырыуҙы төп маҡсат итеп ҡуйған ағым*)

**ЭКСПРЕССИОНИ́СТ** *м* экспрессионист (*экспрессионизм яҡлы*)

**ЭКСПРЕССИОНИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое экспрессионист ...ы, экспрессионизм ...ы; **экспрессиони́стский приём** экспрессионизм алымы

**ЭКСПРЕ́ССИЯ** *ж* экспрессия, тәьҫирлелек, тасуирлау көсө, йәнлелек; **экспре́ссия цве́та** төҫтәрҙең тәьҫирлелеге

**ЭКСПРЕ́ССНЫЙ,** -ая, -ое экспресс ...ы; **экспре́ссный авто́бус** экспресс автобус; **экспре́ссный соста́в** экспресс составы

**ЭКСПРО́МТ** *м* экспромт (**1.** *алдан әҙерләнмәй, ҡапыл ижад ителгән оҫта шиғыр, тапҡыр һүҙ* **2.** *ирекле формала яҙылған кескәй музыкаль әҫәр*); **уда́чный экспро́мт** уңышлы экспромт

**ЭКСПРО́МТОМ** *нареч.* алдан әҙерләнмәй, әҙерлекһеҙ, көтмәгәндә; **произнести́ речь экспро́мтом** әҙерлекһеҙ телмәр тотоу; **приезжа́ть экспро́мтом** көтмәгәндә килеп төшөү

**ЭКСПРОПРИА́ТОР** *м* экспроприатор (*көс менән тартып алыусы*)

**ЭКСПРОПРИА́ЦИЯ** *ж* экспроприацияланыу (**1.** *юр. хөкүмәт тарафынан мәжбүри тартып*

*алыу* **2.** *кит. милектән, социаль хәлдән мәхрүм ителеү)*

**ЭКСПРОПРИИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что; книжн.* экспроприациялау, тартып алыу, мәхрүм итеү; **экспроприи́ровать иму́щество** милкен тартып алыу

**ЭКСПРОПРИИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **экспроприи́ровать**

**ЭКСТА́З** *м* экстаз, ҙур ләззәт, рәхәтлек, шашынып ләззәтләнеү, ярһыған (шашҡан) хәл; **впасть в экста́з** экстазға бирелеү

**ЭКСТАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое экстаз хәлендәге, саманан тыш шатланған, шашынған, ләззәтле; **экстати́ческий смех** шашынған көлөү

**ЭКСТЕНСИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* экстенсив; **экстенси́вное земледе́лие** экстенсив игенселек (һөрөнтө ерҙәрҙе арттырыу)

**ЭКСТЕ́РН** *м* **1.** экстерн (*уҡыу йортонда уҡымай, уҙ аллы һынау биреүсе)* **2.** *в знач. нареч.* **экстéрном** экстерн булып; **окóнчить институ́т экстéрном** институтты экстерн булып тамамлау

**ЭКСТЕРНА́Т** *м* экстернат; **организова́ть экстерна́т** экстернат ойоштороу

**ЭКСТЕРРИТОРИА́ЛЬНОСТЬ** *ж; юр.* экстерриториаллек (*уҙ иле ҡағиҙәләренә генә буйһоноу, урындағы ҡанундарҙан ирекле булыу)*; **пра́во экстерриториа́льности** экстерриториаллек хоҡуғы

**ЭКСТЕРРИТОРИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *юр.* экстерриториаль

**ЭКСТЕРЬÉР** *м; спец.* тороҡ, кәүҙә төҙөлөшө (үҙенсәлеге); **экстерьéр рыси́стых лошаде́й** юртаҡ аттарҙың кәүҙә төҙөлөшө

**ЭКСТЕРЬÉРНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* экстерьер ...ы, тороҡ ...ы, кәүҙә ...ы; **экстерьéрные ка́чества** экстерьер сифаттары; **экстерьéрные осóбенности** кәүҙә үҙенсәлектәре

**Э́КСТРА** *прил. неизм.* экстра (*юғары сифатлы)*; **чай э́кстра** экстра сәй

**ЭКСТРАВАГА́НТНЫЙ,** -ая, -ое экстравагант, ғәжәп шәп, ғәҙәти булмаған; **экстравага́нтное пла́тье** ғәжәп шәп күлдәк

**ЭКСТРА́КТ** *м* **1.** (*вытяжка*) экстракт, һығынды **2.** (*сгущенный сок ягод, плодов*) экстракт, һут; **я́годный экстра́кт** еләк һуты

**ЭКСТРАКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *хим.* экстрактив, айырып (һығып) алына торған; **экстракти́вные веществá** айырып алына торған матдәләр

**ЭКСТРА́КТНЫЙ** и **ЭКСТРА́КТОВЫЙ,** -ая, -ое экстракт ...ы, һығынды ...ы, һығынды яһау ...ы, һут ...ы; **экстра́ктный цех** һығынды яһау цехы

**ЭКСТРА́КЦИЯ** *ж* **1.** *спец.* (*извлечение чего-л.*) һурыу, һурып алыу **2.** *хим.* айырыу, айырып алыу (сығарыу)

**ЭКСТРАОРДИНА́РНОСТЬ** *ж* ғәҙәттән тыш булыу, ғәҙәти булмау, көтөлмәгәнлек; **экстраордина́рность происше́ствия** ваҡиғаның ғәҙәттән тыш булыуы

**ЭКСТРАОРДИНА́РНЫЙ,** -ая, -ое ғәҙәттән тыш, һирәк осрай торған, ғәҙәти булмаған, көтөлмәгән; **экстраордина́рное явле́ние** ғәҙәттән тыш күренеш

**ЭКСТРЕМА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** экстремаль, һуңғы сиктәге, иң юғары (ахырғы); **экстрема́льная температу́ра** экстремаль температура **2.** экстремаль, киҫкен, ғәҙәттән тыш; **экстрема́льные усло́вия** киҫкен шарттар; **экстрема́льная ситуа́ция** ғәҙәттән тыш хәл

**ЭКСТРЕМИ́ЗМ** *м* экстремизм (*иң киҫкен саралар, ҡараштар яҡлы булыу)*

**ЭКСТРЕМИ́СТ** *м* экстремист

**ЭКСТРЕМИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое экстремистар ...ы, экстремизм ...ы; **экстреми́стская газéта** экстремистар гәзите

**Э́КСТРЕННОСТЬ** *ж* ашығыслыҡ, кисектергеһеҙлек; **э́кстренность отъе́зда** китеүҙең ашығыслығы

**Э́КСТРЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*срочный, неотложный*) ашығыс, кисектергеһеҙ; **э́кстренная телегра́мма** ашығыс телеграмма; **э́кстренное совеща́ние** кисектергеһеҙ кәңәшмә **2.** (*чрезвычайный, требующий неотложного вмешательства*) ғәҙәттән тыш, көтөлмәгән, хәл өҫтөндәге; **э́кстренный слу́чай** ғәҙәттән тыш осраҡ; **э́кстренный больно́й** хәл өҫтөндәге ауырыу

**ЭКСЦЕ́НТРИК I** *м* эксцентрик (*әйләнеү үҙәге геометрик үҙәк менән тура килмәгән дуңғәләк)*

**ЭКСЦЕ́НТРИК II** *м* **1.** (*артист*) эксцентрик (*төрлө ҡыланыштар менән көлдөрөүсе)* **2.** *уст.* сәйер (мәҙәк, ғәжәп) кеше; **быть эксце́нтриком** сәйер кеше булыу

**ЭКСЦЕ́НТРИКОВЫЙ,** -ая, -ое эксцентрик ...ы; **эксце́нтриковое кольцо́** эксцентрик ҡулса

**ЭКСЦЕНТРИ́ЧЕСКИЙ I,** -ая, -ое *мат.* эксцентрик (*уртаҡ үҙәге булмаған*); **эксцентри́ческие фигу́ры** эксцентрик фигуралар

**ЭКСЦЕНТРИ́ЧЕСКИЙ II,** -ая, -ое **1.** *театр.* эксцентрик, әкәмәт, көлкөлө, оҫта алымға нигеҙләнгән; **эксцентри́ческий но́мер** эксцентрик номер **2.** ғәжәп, сәйер, мәҙәк; **эксцентри́ческий посту́пок** сәйер ҡылыҡ; **эксцентри́ческий вид** мәҙәк ҡиәфәт; **эксцентри́ческий челове́к** сәйер кеше

**ЭКСЦЕНТРИ́ЧНОСТЬ** *ж; в разн. знач.* эксцентриклыҡ, ғәләмәтлек, әкәмәтлек, ғәжәплек; **эксцентри́чность оде́жды** кейемдең ғәләмәтлеге; **эксцентри́чность выступле́ния** сығыштың әкәмәтлеге

**ЭКСЦЕНТРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **эксцентри́ческий** II 2

**ЭКСЦЕ́СС** *м* **1.** *книжн.* (*крайнее проявление чего-л.*) тайпылыш; (*о чувствах*) тотанаҡһыҙлыҡ, сығырынан сығыу; **эксце́ссы в жи́вописи** һынлы сәнғәттәге тайпылыштар; **чу́вственные эксце́ссы** хис тотанаҡһыҙлығы **2.** (*нарушение нормального хода чего-л.*) бәрелеш, тайпылыш; **предотврати́ть эксце́ссы** тайпылыш булдырмау

**ЭЛАСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **эласти́чный** ♦ **эласти́ческие воло́кна** *биол.* эластик епсәләр

**ЭЛАСТИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** һығылмалылыҡ, һығылыусанлыҡ, һуҙылмалылыҡ; **эласти́чность тка́ни** туҡыманың һығылмалылығы **2.** *перен.* һалмаҡлыҡ, талғынлыҡ; **эласти́чность движе́ний** хәрәкәттәрҙең һалмаҡлығы

**ЭЛАСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*упругий, гибкий*) эластик, һығылмалы; **эласти́чная ко́жа** һығылмалы тире **2.** (*способный растягиваться*) һуҙылмалы; **эласти́чный бинт** һуҙылмалы бинт **3.** *перен., уст.* һалмаҡ, талғын; **эласти́чные движе́ния** талғын хәрәкәттәр **4.** *перен.* үҙгәреүсән, ҡулайланыусан, яйланыусан, ыңғай, һығылмалы; **эласти́чный хара́ктер** ыңғай холоҡ

**ЭЛЕВА́ТОР** *м* элеватор; **засы́пать зерно́ в элева́тор** элеваторға иген һалыу

**ЭЛЕГА́НТНОСТЬ** *ж* элегантлыҡ, күркәмлек, ҡупшылыҡ, көйәҙлек; **элега́нтность оде́жды** кейемдең ҡупшылығы

**ЭЛЕГА́НТНЫЙ,** -ая, -ое элегант, күркәм, ҡупшы, көйәҙ; **элега́нтная же́нщина** ҡупшы ҡатын

**ЭЛЕГИ́СТ** *м* элегист (*элегия яҙыусы*)

**ЭЛЕГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** элегик, элегия ...ы; **элеги́ческие стихи́** элегик шиғырҙар **2.** (*грустно-мечтательный*) элегик, һағышлы, моңло; **элеги́ческие ду́мы** һағышлы уйҙар

**ЭЛЕГИ́ЧНОСТЬ** *ж* һағышлылыҡ, моңһоулыҡ; **элеги́чность произведе́ния** әҫәрҙең һағышлылығы

**ЭЛЕГИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **элеги́ческий** 2

**ЭЛЕ́ГИЯ** *ж* **1.** *лит., муз.* элегия **2.** *перен.* (*грусть, меланхолия*) һағыш

**ЭЛЕКТРИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** *физ. см.* **электризовать** 1; **2.** *мед.* электр менән дауалау

**ЭЛЕКТРИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* **1.** *физ.* электрлау, электр ебәреү (үткәреү), электрланыу **2.** *перен.* ярһытыу, солғау, арбау, тәьҫир итеү; **электризова́ть зри́теля** тамашасыны арбау

**ЭЛЕКТРИЗОВА́ТЬСЯ** **1.** *сов., несов.*; *физ.* электрланыу **2.** *несов. страд. от* **электризова́ть**

**ЭЛЕ́КТРИК** *м*; *разг.* **1.** (*специалист в области электричества*) электрсы **2.** (*электротехник*) электрик; **вы́звать эле́ктрика** электрик саҡырыу

**ЭЛЕКТРИ́К** *прил. неизм.* күгелйем, көлһыу, зәңгәрһыу; **пла́тье цве́та электри́к** көлһыу төҫтәге күлдәк

**ЭЛЕКТРИФИКА́ЦИЯ** *ж* электрлаштырыу, электрификация, электрификациялау; **электрифика́ция желе́зных доро́г** тимер юлдарҙы электрлаштырыу

**ЭЛЕКТРИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* электрлаштырыу, электр үткәреү, электрификациялау; **электрифици́ровать но́вые райо́ны** яңы райондарға электр үткәреү

**ЭЛЕКТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* электр ...ы; **электри́ческая ста́нция** электр станцияһы; **электри́ческий самова́р** электр самауыры; **электри́ческий свет** электр яҡтыһы; **электри́ческий ток** электр тогы **2.** (*совершаемый при помощи электричества*) электр менән; **электри́ческое дое́ние** электр менән һауыу; **электри́ческая чи́стка** электр менән таҙартыу **3.** (*обладающий органом, производящим разряд электричества*) электрлы; **электри́ческий скат** электрлы скат ♦ **электри́ческая ёмкость** электр һыйышлығы; **электри́ческая мо́щность** электр ҡеүәте; **электри́ческий заря́д** электр заряды

**ЭЛЕКТРИ́ЧЕСТВО** *с* электр; **применя́ть электри́чество** электр ҡулланыу; **провести́ электри́чество** электр үткәреү

**ЭЛЕКТРИ́ЧКА** *ж*; *разг.* электричка; **е́хать на электри́чке** электричкала барыу; **расписа́ние электри́чек** электричкаларҙың йөрөш ваҡыты

**ЭЛЕКТРО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "электр", "электр менән" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **электробри́тва** электр ҡырынғысы; **электролече́ние** электр менән дауалау

**ЭЛЕКТРОБУ́Р** *м* электробур, электр бырауы

**ЭЛЕКТРО́БУС** *м* электробус (*аккумулятор менән эшләгән троллейбус*)

**ЭЛЕКТРОБЫТОВО́Й,** -ая, -ое көнкүреш электр ...ы; **электробытовы́е прибо́ры** көнкүреш электр приборҙары

**ЭЛЕКТРОВО́З** *м* электровоз

**ЭЛЕКТРО́Д** *м* электрод (*шыйыҡлыҡ йәки газ аша электр тогы үткәргес*); **положи́тельный электро́д** ыңғай электрод; **отрица́тельный электро́д** кире электрод

**ЭЛЕКТРОДВИ́ГАТЕЛЬ** *м* электр двигателе

**ЭЛЕКТРОДВИ́ЖУЩИЙ,** -ая, -ее *физ.* электр тогын барлыҡҡа килтереүсе, электр йөрөтөү ...ы; **электродви́жущая си́ла** электр йөрөтөү көсө

**ЭЛЕКТРОДИНА́МИКА** *ж* электродинамика (*электр ҡоролмаларының хәрәкәт ҡанундарын һәм үҙ-ара тәьҫир итешеү үҙенсәлектәрен өйрәнеүсе фән*)

**ЭЛЕКТРОДИНАМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *физ.* электродинамик; **электродинами́ческое реле́** электродинамик реле

**ЭЛЕКТРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое электрод ...ы; **электро́дный заво́д** электрод заводы; **электро́дная устано́вка** электрод ҡоролмаһы

**ЭЛЕКТРОДОЕ́НИЕ** *с* электр менән һауыу

**ЭЛЕКТРОДОИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое электр менән һауыу ...ы, электр һауғыс; **электродои́льный аппара́т** электр менән һауыу аппараты

**ЭЛЕКТРОИЗМЕРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое электр үлсәгес, электр үлсәү ...ы; **электроизмери́тельные прибо́ры** электр үлсәгес приборҙар

**ЭЛЕКТРОИЗОЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая -ое электр изоляциялаусы, электр үткәрмәй торған; **электроизоляцио́нный материа́л** электр үткәрмәй торған материал

**ЭЛЕКТРОИНСТРУМЕ́НТ** *м* электр ҡоралы

**ЭЛЕКТРОКА́Р** *м* электрокар (*электр арбаһы*)

**ЭЛЕКТРОКАРДИОГРА́ММА** *ж* электрокардиограмма (*йөрәк эшмәкәрлегенең электрокардиограф ярҙамында теркәлгән һыҙмаһы*)

**ЭЛЕКТРОКАРДИО́ГРАФ** *м* (*прибор*) электрокардиограф

**ЭЛЕКТРОКАРДИОГРА́ФИЯ** *ж* электрокардиография (*йөрәк эшмәкәрлеген электрокардиограф менән тикшереү*)

**ЭЛЕКТРОЛЕЧЕ́НИЕ** *с* электр менән дауалау

**ЭЛЕКТРО́ЛИЗ** *м*; *хим.* электролиз

**ЭЛЕКТРО́ЛИЗНЫЙ,** -ая, -ое электролиз ...ы; **электро́лизный цех** электролиз цехы; **электро́лизная ва́нна** электролиз ҡорнаһы (ваннаһы)

**ЭЛЕКТРОЛИ́НИЯ** *ж* электр линияһы; **провести́ электроли́нию** электр линияһы үткәреү

**ЭЛЕКТРОЛИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *хим.* электролитик, электролиз ...ы; **применя́ть электролити́ческий ме́тод** электролиз ысулын ҡулланыу; **электролити́ческая медь** электролитик баҡыр

**ЭЛЕКТРОЛИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое электролит ...ы; **электроли́тный заво́д** электролит заводы

**ЭЛЕКТРОЛИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **электроли́т** *м*) электролит(тар); **электроли́ты аккумуля́тора** аккумулятор электролиттары

**ЭЛЕКТРОМАГНЕТИ́ЗМ** *м*; *физ.* электромагнетизм (*электр тогы менән тыуҙырылған магнит көренештәре*)

**ЭЛЕКТРОМАГНИ́Т** *м* электромагнит

**ЭЛЕКТРОМАГНИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое электромагнит ...ы, электромагнетизм ...ы; **электромагни́тные во́лны** электромагнит тулҡындары; **электромагни́тная тео́рия** электромагнетизм теорияһы ♦ **электромагни́тное по́ле** электромагнит ҡыры

**ЭЛЕКТРОМАШИ́НА** *ж* электр машинаһы

**ЭЛЕКТРОМАШИНОСТРОЕ́НИЕ** *с* электр машиналары төҙөү

**ЭЛЕКТРОМЕТАЛЛУ́РГИЯ** и **ЭЛЕКТРОМЕТАЛЛУРГИ́Я** *ж* электр металлургияһы

**ЭЛЕКТРОМЕ́ТР** *м* электрометр (*үлсәү приборы*)

**ЭЛЕКТРОМЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое электрометрик, электрометрия ...ы; **электрометри́ческий показа́тель** электрометрик күрһәткес

**ЭЛЕКТРОМЕ́ТРИЯ** *ж* электрометрия (*электр үлсәү ысулдары һәм алымдары*)

**ЭЛЕКТРОМЕХАНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое электромеханика ...ы, электромеханик; **электромехани́ческий цех** электромеханика цехы; **электромехани́ческая обрабо́тка мета́ллов** металдарҙы электромеханик юл менән эшкәртеү

**ЭЛЕКТРОМОБИ́ЛЬ** *м* электромобиль

**ЭЛЕКТРОМОНТА́Ж** *м* электромонтаж

**ЭЛЕКТРОМОНТА́ЖНИК** *м* электромонтажсы

**ЭЛЕКТРОМОНТА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое электромонтаж ...ы; **электромонта́жные рабо́ты** электромонтаж эштәре

**ЭЛЕКТРОМОНТЁР** *м* электромонтёр; **рабо́тать электромонтёром** электромонтёр булып эшләү

**ЭЛЕКТРОМОТО́Р** *м* электр моторы

**ЭЛЕКТРО́Н I** *м*; *физ.* электрон (*атом составындағы кире электр зарядлы өлөшсә*)

**ЭЛЕКТРО́Н II** *м*; *уст.* электрон (*алюминий, магний, литий, цинк ҡатнашҡан махсус иретмә*)

**ЭЛЕКТРО́НИКА** *ж* электроника (*фән тармағы*)

**ЭЛЕКТРО́ННО-ВЫЧИСЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое электрон-хисаплау ...ы, электрон-иҫәпләү ...ы; **электро́нно-вычисли́тельная маши́на** электрон-иҫәпләү машинаһы

**ЭЛЕКТРО́ННЫЙ I,** -ая, -ое *физ.* электрон, электронлы; **электро́нный микроско́п** электронлы микроскоп; **электро́нная оболо́чка а́тома** атомдың электронлы тышсаһы; **электро́нная ла́мпа** электрон лампа

**ЭЛЕКТРО́ННЫЙ II,** -ая, -ое электрон, электрондан яһалған (эшләнгән); **электро́нная пласти́нка** электрондан яһалған пластинка

**ЭЛЕКТРООБОРУ́ДОВАНИЕ** *с* электр йыһазы; **электрооборудование самолёта** самолёттың электр йыһазы

**ЭЛЕКТРОПЕРЕДА́ЧА** *ж* **1.** электр биреү (тапшырыу) **2.** (*совокупность сооружений*) электр биреү (тапшырыу) ҡоролмалары

**ЭЛЕКТРОПЕ́ЧЬ** *ж* электр мейесе

**ЭЛЕКТРОПИЛА́** *ж* электр бысҡыһы

**ЭЛЕКТРОПЛА́ВКА** *ж* электр менән ҡойоу (иретеү)

**ЭЛЕКТРОПО́ЕЗД** *м* электропоезд

**ЭЛЕКТРОПРЕДОХРАНИ́ТЕЛЬ** *м* электр һаҡлағысы

**ЭЛЕКТРОПРО́ВОД** *м* электр сымы

**ЭЛЕКТРОПРОВО́ДНОСТЬ** *ж*; *физ.* электр үткәреүсәнлек; **электропрово́дность алюми́ния** алюминийҙың электр үткәреүсәнлеге

**ЭЛЕКТРОПРОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *физ.* электр тогы үткәреүсе, электр үткәреүсән; **электропрово́дные вещества́** электр үткәреүсән матдәләр

**ЭЛЕКТРОПРОГРЕ́В** *м*; *спец.* электр менән йылытыу

**ЭЛЕКТРОПРОЙГРЫВАТЕЛЬ** *м* электр уйнатҡыс

**ЭЛЕКТРОПРОМЫ́ШЛЕННОСТЬ** *ж* электр сәнәғәте

**ЭЛЕКТРОСВА́РКА** *ж* электросварка (*электр менән иретеп йәбештереү*)

**ЭЛЕКТРОСВА́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** электросварка ...ы; **электросва́рочное обору́дование** электросварка ҡорамалы **2.** *в знач. сущ.* **электросва́рочная** *ж*; *разг.* электросварка бүлмәһе (оҫтаханаһы)

**ЭЛЕКТРОСВА́РЩИК** *м* электросварщик

**ЭЛЕКТРОСЕ́ТЬ** *ж* электр селтәре

**ЭЛЕКТРОСИСТЕ́МА** *ж* электр системаһы; **электросисте́ма Респу́блики Башкортоста́н** Башҡортостан Республикаһының электр системаһы

**ЭЛЕКТРОСКО́П** *м* электроскоп

**ЭЛЕКТРОСНАБЖЕ́НИЕ** *с* электр менән тәьмин итеү

**ЭЛЕКТРОСТА́ЛЬ** *ж* электр ҡоросо

**ЭЛЕКТРОСТА́НЦИЯ** *ж* электр станцияһы; **а́томная электроста́нция** атом электр станцияһы

**ЭЛЕКТРОСТА́ТИКА** *ж* электростатика (*хәрәкәтһеҙ электр зарядтарын өйрәнеүсе фән*)

**ЭЛЕКТРОСТАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *физ.* электростатик; **электростати́ческое по́ле** электростатик ҡыр; **электростати́ческий генера́тор** электростатик генератор

**ЭЛЕКТРОТЕРАПИ́Я** *ж* электротерапия (*электр менән дауалау*)

**ЭЛЕКТРОТЕРМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое электротермик (*электр йылылығы ҡатнашлығындағы*); **электротерми́ческий проце́сс** электротермик процесс

**ЭЛЕКТРОТЕРМИ́Я** *ж* электротермия (*электроникала электр йылылығын ҡулланыу өлкәһе*)

**ЭЛЕКТРОТЕ́ХНИК** *м* электротехник (*белгес*)

**ЭЛЕКТРОТЕ́ХНИКА** *ж* электротехника

**ЭЛЕКТРОТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое электротехника ...ы, электротехник; **электротехни́ческий институ́т** электротехника институты; **электротехни́ческое обору́дование** электротехник йыһаздар

**ЭЛЕКТРОТОВА́РЫ** *только мн.* электр тауарҙары

**ЭЛЕКТРОХИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое электрохимия ...ы, электрохимик; **электрохими́ческие иссле́дования** электрохимик тикшеренеүҙәр

**ЭЛЕКТРОХИ́МИЯ** *ж* электрохимия (*физик химияның бер бүлеге*)

**ЭЛЕКТРОХО́Д** *м* электроход (*электр двигателе менән эшләй торған судно*)

**ЭЛЕКТРОЭНЕ́РГИЯ** *ж* электр энергияһы

**ЭЛЕМЕ́НТ** *м* **1.** *филос.* (*одно из первоначал, стихия*) тәү элемент **2.** *мн.* **элеме́нты** (*основы чего-л.*) нигеҙ, башланғыс; **элеме́нты геоме́трии** геометрия нигеҙҙәре **3.** *хим.* элемент; **периоди́ческая систе́ма элеме́нтов** элементтарҙың периодик системаһы **4.** (*часть целого*) элемент, өлөш, киҫәк; **ва́жный элеме́нт произведе́ния** әҫәрҙең мөһим өлөшө **5.** (*характерная деталь*) элемент, үрнәк; **элеме́нты ска́зки** әкиәт элементтары **6.** *собир.* или *мн.* **элеме́нты** (*представители какой-л. общественной среды*) элемент(тар), ҡатлам; **прогресси́вные элеме́нты о́бщества** йәмғиәттең алдынғы ҡатламы, йәмғиәттәге прогрессив элементтар **7.** *какой*; *разг.* (*человек, личность*) кеше, әҙәм, шәхес; **подозри́тельный элеме́нт** шикле кеше **8.** элемент (*электр тоғын барлыҡҡа килтереүсе прибор*); **гальвани́ческий элеме́нт** гальваник элемент

**ЭЛЕМЕНТА́РНОСТЬ** *ж* **1.** (*отсутствие сложности*) ябайлыҡ, элементарлыҡ; **элемента́рность зада́чи** мәсьәләнең ябайлығы **2.** (*упрощённость, ограниченность*) сикләнгәнлек; **элемента́рность взгля́дов** ҡараштарҙың сикләнгәнлеге

**ЭЛЕМЕНТА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*начальный*) элементар, башланғыс; **элемента́рная матема́тика** элементар математика **2.** (*простейший*) элементар, ябай, асыҡ, аңлайышлы; **элемента́рный приме́р** ябай миҫал **3.** (*ограниченный, упрощённый*) тар, сикләнгән, самалы, еңелсә, өҫтән генә; **элемента́рное рассужде́ние** тар фекер йөрөтөү **4.** *перен.* (*основной*) төп, нигеҙ; **элемента́рное усло́вие** төп шарт **5.** *хим.* элементар, элемент ...ы; **элемента́рный ана́лиз** элементар анализ; **элемента́рный соста́в вещества́** матдәнең элементар составы **6.** *физ.* элементар; **элемента́рные части́цы** элементар киҫәксәләр

**ЭЛИ́ЗИЯ** *ж*; *лингв.* элизия (*ике һүҙ араһында һуҙынҡы өндөң төшөп ҡалыуы, мәҫ., "алма ағасы" — "алмағас", "оло атай" — "олатай"*)

**ЭЛИКСИ́Р** *м* эликсир; **зубно́й эликси́р** теш эликсиры ♦ **жи́зненный эликси́р**; **эликси́р жи́зни**: 1) *уст.* тере һыу, йәншишмә; 2) көс биреүсе, йәшәү эликсиры

**ЭЛИМИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что*; *книжн.* алып (сығарып) ташлау, юҡ итеү; **элимини́ровать нето́чности** хаталарҙы юҡ итеү; **элимини́ровать неизве́стный член уравне́ния** тигеҙләмәнән билдәһеҙ быуынды алып ташлау

**ЭЛИ́ТА** *ж собир.* элита (**1.** *үҫемлектәрҙең һәм хайуандарҙың һайлап алынған иң яҡшы төрө* **2.** *йәмғиәттең йәки айырым бер төркөмдөң иң яҡшы вәкилдәре*); **эли́та пшени́цы** бойҙай элитаһы; **войти́ в эли́ту** элитаға инеү

**ЭЛИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое элита ...ы, элиталы; **эли́тные семена́** элита орлоҡтары

**ЭЛЛИНИ́ЗМ** *м* эллинизм (**1.** *боронғо греккөнсығыш мәҙәниәтенең сәскә атыу осоро* **2.** *боронғо грек теленән алынған һүҙ йәки әйтемдәр*)

**ЭЛЛИНИ́СТ** *м*; *уст.* эллинист (*боронғо грек теле һәм әҙәбиәте белгесе; боронғо грек мәҙәниәте менән мауығыусы*)

**ЭЛЛИНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эллинизм ...ы; **эллинисти́ческая литерату́ра** эллинизм әҙәбиәте

**Э́ЛЛИНЫ** *мн.* (*ед.* **э́ллин** *м* и **э́ллинка** *ж*) эллиндар (*боронғо гректар*)

**Э́ЛЛИПС** *м* эллипс (**1.** *мат. йомоҡ кәкре һыҙыҡ* **2.** *тыңәрәкте хәтерләткән һыҙатланыш, күренеш*); **э́ллипс о́зера** күл эллипсы

**Э́ЛЛИПСИС** *м*; *лингв.* эллипсис (*һөйләмдә үҙенән-үҙе аңлашылып торған һүҙҙе төшөрөп ҡалдырыу*)

**ЭЛЛИПСО́ИД** *м*; *мат.* эллипсоид (*эллипсты үҙ күсәренең береһе тирәһендә әйләндереүҙән яһалған яҫылыҡ*)

**ЭЛЛИПТИ́ЧЕСКИЙ I,** -ая, -ое **1.** *мат.* эллиптик; **эллипти́ческая фо́рма те́ла** есемдең эллиптик формаһы **2.** эллипс рәүешендәге, эллипс һымаҡ (кеүек), эллипсҡа оҡшаш; **эллипти́ческий ште́мпель** эллипс һымаҡ штемпель

**ЭЛЛИПТИ́ЧЕСКИЙ II,** -ая, -ое *лингв.* эллипсис, эллипсис ...ы; **эллипти́ческая констру́кция** эллипсис конструкция

**ЭМА́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое эмаль ...ы, эмаль, эмалле, үң, үң ...ы; **эма́левый соста́в** үң составы; **эма́левая посу́да** эмаль һауыт-һаба ♦ **эма́левые кра́ски** эмаль буяуҙар

**ЭМАЛИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **эмалирова́ть 2.** *прил.* үң йүгертелгән, эмалле, эмалләнгән; **эмалиро́ванная ми́ска** эмалле сеүәтә

**ЭМАЛИРОВА́ТЬ** *несов. что* эмалләү, эмаль (үң) йүгертеү; **эмалирова́ть ва́нну** ҡорнаны эмалләү

**ЭМАЛИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **эмалирова́ть 2.** *разг.* (*слой эмали*) эмаль, үң, эмаль (үң) ҡатламы; **тре́щина на эмалиро́вке** эмалдәге сатнаған урын

**ЭМАЛИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое эмалләү ...ы, эмаль (үң) йүгертеү ...ы; **эмалиро́вочные рабо́ты** эмалләү эштәре

**ЭМАЛИРО́ВЩИК** *м* эмалләүсе

**ЭМА́ЛЬ** *ж* **1.** эмаль, үң; **цветна́я эма́ль** төҫлө эмаль; **эма́ль зу́ба** теш үңе **2.** *обычно мн.* **эма́ли** эмалдәр (*эмаль йүгертелгән художестволы әйберҙәр*); **колле́кция эма́лей** эмалдәр коллекцияһы **3.** (*эмалевые краски*) эмаль буяуҙар

**ЭМАЛЬЕ́Р** *м* эмалсе (*эмаль әҙерләү оҫтаһы*)

**ЭМАНСИПА́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* эмансипация, азат итеү (ителеү, булыу), ирекҡә сығыу (сығарыу); **эмансипа́ция же́нщин** ҡатын-ҡыҙҙарҙы азат итеү

**ЭМАНСИПИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **эмансипи́ровать 2.** *прил.* азат, ирекле, хөр фекерле; **эмансипи́рованные же́нщины** азат ҡатын-ҡыҙҙар

**ЭМАНСИПИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что*; *книжн.* сикләмәү, азат итеү, ирек биреү, ҡотҡарыу; **эмансипи́ровать ли́чность** шәхескә ирек биреү

**ЭМБА́РГО** *с нескл.*; *юр.* эмбарго (*сит илдән алтын, валюта, ҡайһы бер тауар төрҙәрен индереүҙе йәки сығарыуҙы тыйыу*); **наложи́ть эмба́рго** эмбарго һалыу

**ЭМБЛЕ́МА** *ж* эмблема, билге; **эмбле́ма конфере́нции** конференцияның эмблемаһы

**ЭМБОЛИ́Я** *ж*; *мед.* эмболия (*ҡан тамыры томаланыу*)

**ЭМБРИО́ЛОГ** *м* эмбриолог (*эмбриология белгесе*)

**ЭМБРИОЛО́ГИЯ** *ж* эмбриология (*яралғы үҫешен өйрәнә торған фән*)

**ЭМБРИО́Н** *м* **1.** *биол.* эмбрион, яралғы, бәбәк **2.** *перен.* орлоҡ, сығанаҡ; **эмбрио́н мы́сли** фекер сығанағы

**ЭМБРИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *биол.* эмбрион ...ы, яралғы ...ы, бәбәк ...ы, эмбриональ; **эмбриона́льный пери́од** эмбрион осоро; **эмбриона́льное разви́тие** яралғы үҫеше **2.** *перен.* эмбрион ...ы, эмбриональ, яралғы ...ы; **боле́знь в эмбриона́льном состоя́нии** эмбрион хәлендәге ауырыу

**ЭМИГРА́НТ** *м* и **ЭМИГРА́НТКА** *ж* эмигрант; **полити́ческий эмигра́нт** сәйәси эмигрант

**ЭМИГРА́НТСКИЙ,** -ая, -ое эмигрант ...ы; **эмигра́нтская жи́знь** эмигрант тормошо; **эмигра́нтская слу́жба** эмигрант хеҙмәте

**ЭМИГРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое эмиграция ...ы

**ЭМИГРА́ЦИЯ** *ж* **1.** эмиграция (*мәжбүри йәки үҙ ирке менән сит илгә күсеү, йәшәү*); **жить в эмигра́ции** эмиграцияла йәшәү **2.** *собир.* эмигранттар, эмиграция; **полити́ческая эмигра́ция** сәйәси эмиграция

**ЭМИГРИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* күсеп китеү; **эмигри́ровать из страны́** илдән күсеп китеү

**ЭМИ́Р** *м* әмир

**ЭМИРА́Т** *м* әмирлек, әмират (*әмир етәкселек иткән ил, биләмә*)

**ЭМИССА́Р** *м* эмиссар (*йәшерен сәйәси эш менән сит илгә ебәрелгән кеше*)

**ЭМИССИО́ННЫЙ I,** -ая, -ое *фин.* эмиссия ...ы; **эмиссио́нное пра́во** эмиссия хоҡуғы; **эмиссио́нный банк** эмиссия банкыһы

**ЭМИССИО́ННЫЙ II,** -ая, -ое *физ.* эмиссион ...ы; **эмиссио́нный микроско́п** эмиссион микроскоп

**ЭМИ́ССИЯ I** *ж*; *фин.* эмиссиялау, эмиссия (*әйләнешкә аҡса йәки ҡиммәтле ҡағыҙҙар сығарыу*); **разме́р эми́ссии** эмиссия күләме; **широ́кая эми́ссия банкно́т** банкноттарҙы күпләп эмиссиялау

**ЭМИ́ССИЯ II** *ж*; *физ.* эмиссия (*ҡаты йәки шыйыҡ есемдәрҙең йылытыуҙан, ток тәьҫиренән электрондарҙы, иондарҙы һауаһыҙ бушлыҡҡа йәки газ мөхитенә бүлеп сығарыуы*)

**ЭМИТИ́РОВАТЬ I** *сов., несов. что*; *фин.* эмиссиялау, эмиссия яһау (сығарыу)

**ЭМИТИ́РОВАТЬ II** *сов., несов. что*; *физ.* эмиссиялау (*электрон бүлеп сығарыу*)

**ЭМОЦИОНА́ЛЬНОСТЬ** *ж* хислелек, тойғоға бирелеүсәнлек, эмоционаллек; **эмоциона́льность пе́сни** йырҙың хислелеге

**ЭМОЦИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** хисле, тойғоға бай, эмоциялы, күтәренке, тәьҫирле; **эмоциона́льная речь** хисле телмәр **2.** эмоцияға (тойғоға) бирелеүсән, тиҙ ярһыусан; **эмоциона́льный челове́к** тойғоға тиҙ бирелеүсән кеше

**ЭМО́ЦИЯ** *ж* эмоция, хис, тойғо, кисереш; **эмо́ция ра́дости** шатлыҡ тойғоһо; **эмо́ция удивле́ния** аптырау тойғоһо; **поддава́ться эмо́циям** эмоцияға бирелеү

**ЭМПИРЕ́Й: вита́ть в эмпире́ях** *см.* **вита́ть**

**ЭМПИРИ́ЗМ** *м*; *филос.* эмпиризм (**1.** *донъяны өйрәнеүҙә тәжрибәне һәм һиҙемде берҙәнбер сығанаҡ тип, ә тәжрибә һөҙөмтәләрен теркәү һәм танып белеүҙең төп күрһәткесе тип ҡараған фәлсәфәүи йүнәлеш* **2.** *тәжрибә үткәреү, һынау, практик эшмәкәрлек*)

**ЭМПИ́РИК** *м* эмпирик (*эмпиризм яҡлы кеше*)

**ЭМПИРИОКРИ́ТИК** *м* эмпириокритик (*эмпириокритицизм яҡлы кеше*)

**ЭМПИРИОКРИТИЦИ́ЗМ** *м*; *филос.* эмпириокритицизм (*XIX б. аҙағында — XX б. башында фәлсәфәлә барлыҡҡа килгән субъектив-идеалистик ағым, махизм*)

**ЭМПИРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эмпирик, эмпиризм ...ы; **эмпири́ческая филосо́фия** эмпирик фәлсәфә; **эмпири́ческая литерату́ра** эмпирик әҙәбиәт

**ЭМПИРИ́Я** *ж* эмпирия (**1.** *кеше тәжрибәһе, һиҙеү ағзалары аша алған тәьҫорат* **2.** *тәбиғи шарттарҙағы күҙәтеү*)

**ЭМУЛЬСИО́ННЫЙ,** -ая, -ое эмульсия ...ы, эмульсион; **эмульсио́нный слой** эмульсия ҡатламы

**ЭМУЛЬСИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** эмульсия яһау **2.** (*наносить эмульсию*) эмульсия һөртөү

**ЭМУЛЬСИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* эмульсияға әйләнеү **2.** *несов. страд. от* **эмульси́ровать**

**ЭМУ́ЛЬСИЯ** *ж* эмульсия (**1.** *хим. эҙендә берәй матдәнең иремәгән бөрсөктәре булған шыйыҡса* **2.** *фотоҡағыҙҙарҙа, фотопластинкаларҙа яҡтылыҡҡа һиҙгер ҡатлам*)

**ЭМФА́ЗА** *ж* эмфаза (**1.** *әҙ. телмәр, ижек тасуирлығын көсәйтеү* **2.** *лингв. айырым өндәрҙе әйтеүҙәге көсөргәнешлек*)

**ЭМФАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *лит.* йәнле, күтәренке, тәьҫирле, хисле, эмфатик; **эмфати́ческая речь** йәнле телмәр **2.** *лингв.* көсөргәнешле әйтелгән, эмфатик; **эмфати́ческие зву́ки** көсөргәнешле әйтелгән өндәр; **эмфати́ческое ударе́ние** эмфатик баҫым

**ЭМФИЗЕ́МА** *ж*; *мед.* эмфизема (*тән туҡымаһына, берәй ағзаға һауа йыйылыу күренеше*); **подко́жная эмфизе́ма** тире аҫты эмфиземаһы ♦ **эмфизе́ма лёгких** үпкә эмфиземаһы (*артыҡ һауа йыйылыуҙан үпкәнең киңәйеүе*)

**ЭНДЕ́МИКИ** *мн.* (*ед.* **энде́мик** *м*); *бот., зоол.* эндемиктар (*билдәле географик урында таралған үҫемлектәр, хайуандар*)

**ЭНДЕМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *спец.* эндемик, ерле, урындағы (*айырым урынға хас*); **эндеми́ческие боле́зни у живо́тных** хайуандарҙың эндемик ауырыуҙары

**ЭНДЕМИ́Я** *ж*; *спец.* эндемия (*айырым тәбиғәт үҙенсәлектәренә һәм халыҡтың йәшәү рәүешенә бәйле ауырыуҙар*)

**ЭНДО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "эске" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **эндотерми́ческий** эндотерметик

**ЭНДОГА́МИЯ** *ж*; *этн.* эндогамия (*бер ҡәбилә эсендә өйләнешеү*)

**ЭНДОГА́МНЫЙ,** -ая, -ое *этн.* эндогамиялы, эндогам; **эндога́мное пле́мя** эндогам ҡәбилә

**ЭНДОГЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* эндоген, эске; **эндоге́нные причи́ны** эске сәбәптәр; **эндоге́нные измене́ния по́чвы** тупраҡтың эске үҙгәреше; **эндоге́нные си́лы** эске көстәр

**ЭНДОКА́РД** *м*; *анат.* эндокард (*йөрәктең эске ҡатламы*)

**ЭНДОКАРДИ́Т** *м*; *мед.* эндокардит (*йөрәк ауырыуы*)

**ЭНДОКРИ́ННЫЙ,** -ая, -ое *физиол.* эндокрин, эндокрин ...ы; **эндокри́нные заболева́ния** эндокрин ауырыуҙар ♦ **эндокри́нные же́лезы** *анат.* эндокрин биҙҙәр; **эндокри́нная систе́ма** эндокрин система, эске биҙҙәр системаһы

**ЭНДОКРИНО́ЛОГ** *м* эндокринолог (*эндокринология белгесе*)

**ЭНДОКРИНОЛО́ГИЯ** *ж* эндокринология (*эске секреция биҙҙәре тураһындағы фән*)

**ЭНДОСКО́П** *м* эндоскоп (*прибор*)

**Э́НДШПИЛЬ** *м* эндшпиль (*шахмат уйыныың тамамланыу мәле*)

**ЭНЕОЛИ́Т** *м*; *археол.* энеолит (*таш быуаттан бронза быуатына күсеү осоро, баҡыр быуат*)

**ЭНЕРГЕ́ТИК** *м* энергетик (*энергетика белгесе*); **гла́вный энерге́тик** баш энергетик

**ЭНЕРГЕ́ТИКА** *ж* энергетика; **разви́тие энерге́тики** энергетика үҫеше

**ЭНЕРГЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое энергетик, энергетика ...ы, энергия ...ы; **энергети́ческие ресу́рсы** энергия ресурстары; **энергети́ческое то́пливо** энергетик яғыулыҡ

**ЭНЕРГИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** дәртлелек, ғәйрәт, етеҙлек, эшлеклелек; **исключи́тельная энерги́чность** һирәк була торған ғәйрәт **2.** ҡәтғилек, киҫкенлек; **энерги́чность реше́ния** ҡарарҙың ҡәтғилеге

**ЭНЕРГИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** әүҙем, дәртле, ғәйрәтле, ғәййәр, көслө, етеҙ, энергиялы; **энерги́чный челове́к** дәртле кеше; **энерги́чное движе́ние** етеҙ хәрәкәт; **энерги́чная похо́дка** ғәйрәтле баҫып йөрөү **2.** (*решительный*) ҡәтғи, киҫкен, көслө; **энерги́чный проте́ст** киҫкен ҡаршылыҡ; **энерги́чные ме́ры** ҡәтғи саралар

**ЭНЕ́РГИЯ** *ж* **1.** *физ., тех.* энергия, ҡеүәт, көс; **теплова́я эне́ргия** йылылыҡ энергияһы; **эне́ргия пото́ка** ағым ҡеүәте; **затра́та эне́ргии** көс сарыф итеү **2.** (*решительность, настойчивость*) ныҡышмалылыҡ, дәрт, ғәйрәт; **взя́ться за де́ло с эне́ргией** эшкә дәрт менән тотоноу

**ЭНЕРГО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "энергия", "энергетик" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **энергобала́нс** энергетик баланс; **энергоснабже́ние** энергия менән тәьмин итеү

**ЭНЕРГОЁМКИЙ,** -ая, -ое күп энергия талап итеүсе; **энергоёмкие о́трасли промы́шленности** сәнәғәттең күп энергия талап итеүсе тармаҡтары

**ЭНЕРГОСИСТЕ́МА** *ж* энергия системаһы

**ЭНЕ́ЦКИЙ,** -ая, -ое эн ...ы; **эне́цкий язы́к** эн теле

**ЭНКЛИ́ТИКА** *ж*; *лингв.* энклитика (*баҫымы булмаған һүҙ*)

**ЭНКЛИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лингв.* энклитик ...ы; **энклити́ческие части́цы** энклитик киҫәксәләр

**Э́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ниндәйҙер бер, билдәһеҙ; **э́нное число́** ниндәйҙер бер һан; **э́нная величина́** ниндәйҙер бер дәүмәл **2.** *разг.* (бик) күп, сикһеҙ; **повтори́ть э́нное коли́чество раз** күп тапҡыр ҡабатлау

**ЭНТЕРИ́Т** *м*; *мед.* энтерит (*эсәк ауырыуы*)

**ЭНТОМО́ЛОГ** *м* энтомолог (*энтомология белгесе*)

**ЭНТОМОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое энтомологик, энтомология ...ы; **энтомологи́ческие иссле́дования** энтомологик тикшеренеүҙәр

**ЭНТОМОЛО́ГИЯ** *м* энтомология (*бөжәктәрҙе өйрәнә торған фән*)

**ЭНТУЗИА́ЗМ** *м* энтузиазм, дәрт, күтәренкелек, илһам; **тво́рческий энтузиа́зм** ижади дәрт; **рабо́тать с энтузиа́змом** дәрт менән эшләү

**ЭНТУЗИА́СТ** *м* и **ЭНТУЗИА́СТКА** *ж* энтузиаст

**ЭНЦЕФАЛИ́Т** *м*; *мед.* энцефалит (*баш мейеһе ауырыуы*)

**ЭНЦЕФАЛОМИЕЛИ́Т** *м*; *мед.* энцефаломиелит (*баш һәм арҡа мейеһе ауырыуы*)

**ЭНЦИКЛОПЕДИ́ЗМ** *м* энциклопедизм (*бөтә яҡтан белемле булыу*)

**ЭНЦИКЛОПЕДИ́СТ** *м* энциклопедист (**1.** *киң* (*тәрән*) *белемле кеше* **2.** *тар. XVIII б. аҙағында Францияла алдынғы фекер эйәләре төркөмөнөң вәкиле*)

**ЭНЦИКЛОПЕДИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** энциклопедик, энциклопедия ...ы; **энциклопеди́ческий слова́рь** энциклопедик һүҙлек **2.** энциклопедик, киң, күп яҡлы, тәрән; **энциклопеди́ческий ум** энциклопедик аҡыл; **энциклопеди́ческие зна́ния** тәрән (күп яҡлы) белем

**ЭНЦИКЛОПЕДИ́ЧНОСТЬ** *ж* күп яҡлылыҡ; **энциклопеди́чность зна́ний** белемдең күп яҡлы булыуы

**ЭНЦИКЛОПЕДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **энциклопеди́ческий** 2

**ЭНЦИКЛОПЕ́ДИЯ** *ж* энциклопедия (**1.** *фәндең барлыҡ йәки айырым тармаҡтары буйынса тулы мәғлүмәт биргән һүҙлек рәүешендәге ғилми әсбап* **2.** *күсм. берәй мәсьәлә буйынса тупланған мәғлүмәттәр йыйылмаһы*); **сельскохозя́йственная энциклопе́дия** ауыл хужалығы энциклопедияһы ♦ **ходя́чая энциклопе́дия** *шутл.* аяҡлы энциклопедия; һәр яҡлап мәғлүмәтле, белемле кеше

**Э́НЦЫ** *мн.* эндар, эн халҡы (*Таймырҙа йәшәүсе халыҡ*)

**ЭОЛИ́Т** *м*; *археол.* эолит (*таш быуаттың боронғо дәүере*)

**ЭО́ЛОВ: эо́лова а́рфа** Эол арфаһы

**ЭПАТА́Ж** *м* шаҡ ҡатырыу, хайран ҡалдырыу, ғауғалау; **организова́ть для эпата́жа зри́телей** *что-л.* *нимәлер* тамашасыларҙы шаҡ ҡатырыу өсөн ойоштороу

**ЭПАТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* шаҡ ҡатырыу, таң ҡалдырыу, аптырашта ҡалдырыу, ғауғалау; **эпати́ровать зри́теля** тамашасыны таң ҡалдырыу

**ЭПИГО́Н** *м* эпигон, эйәреүсе (*берәй йүнәлешкә эйәреп иҫкергән, тапалған идеяларҙы, ысулдарҙы ҡабатлаусы*)

**ЭПИГРА́ММА** *ж* эпиграмма (**1.** *тар. боронғо гректарҙа иҫтәлекле бүләк, һәйкәл, ҡомартҡы кеүек әйберҙәргә аңлатма рәүешендә проза йәки шиғыр менән яҙылған яҙыу* **2.** *ҡыҫҡа сатирик шиғыр*); **писа́ть эпигра́мму** эпиграмма яҙыу

**ЭПИГРАММАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эпиграмма ...ы; **эпиграммати́ческий стиль** эпиграмма стиле

**ЭПИ́ГРАФ** *м* эпиграф (**1.** *тар. боронғо гректарҙа һәйкәлдәге яҙыу* **2.** *әҙ. төп идеяны сағылдырыу маҡсатында әҫәр алдынан йәки уның бүлеге алдынан бирелгән ҡыҫҡа әйтем*); **эпи́граф к рома́ну** романға эпиграф

**ЭПИГРА́ФИКА** *ж* эпиграфика (*тарих фәненең металл, таш, төрлө һауыт-һаба һ.б. яҙылған яҙыуҙарҙы өйрәнә торған тармағы*)

**ЭПИГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эпиграфик, эпиграфика ...ы; **эпиграфи́ческий текст** эпиграфик текст

**ЭПИДЕМИО́ЛОГ** *м* эпидемиолог (*эпидемиология белгесе*)

**ЭПИДЕМИОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эпидемиологик, эпидемиология ...ы; **эпидемиологи́ческие заключе́ния** эпидемиология һығымталары

**ЭПИДЕМИОЛО́ГИЯ** *ж* эпидемиология (*йоғошло ауырыуҙар тураһындағы фән*)

**ЭПИДЕМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** эпидемик, эпидемия ...ы, киҙеү ...ы; **эпидеми́ческое заболева́ние** киҙеү сире; **эпидеми́ческая вспы́шка** эпидемия башланыуы **2.** эпидемияға бәйле (ҡаршы); **эпидеми́ческие приви́вки** эпидемияға ҡаршы прививкалар **3.** *перен.* эпидемия рәүешендәге, таралыусан, тиҙ отоп алына торған; **эпидеми́ческая безрабо́тица** эпидемия рәүешендәге эшһеҙлек

**ЭПИДЕ́МИЯ** *ж* **1.** эпидемия, киҙеү; **эпиде́мия гри́ппа** грипп эпидемияһы **2.** *перен.* эпидемия, таралыу; **эпиде́мия ма́ссовой спекуля́ции** күмәк спекуляцияның таралыуы

**ЭПИДЕ́РМИС** *м* и *уст.* **ЭПИДЕ́РМА** *ж*; *биол., бот.* тиресә, эпидермис, эпидерма

**ЭПИДИАСКО́П** *м*; *тех.* (*прибор*) эпидиаскоп

**ЭПИЗО́Д** *м* **1.** (*случай из жизни*) хәл, ваҡиға; **па́мятный эпизо́д** иҫтәлекле ваҡиға **2.** (*сцена, отрывок художественного произведения*) эпизод, күренеш, өҙөк; **эпизо́д карти́ны** картинаның бер күренеше; **незако́нченный эпизо́д** тамамланмаған эпизод

**ЭПИЗОДИ́ЧЕСКИЙ** и **ЭПИЗОДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** эпизодик, ваҡыт-ваҡыт, әллә ниҙә бер; **эпизоди́ческий слу́чай** эпизодик хәл; **эпизоди́ческие встре́чи** ваҡыт-ваҡыт осрашыуҙар; **эпизоди́ческая прове́рка** әллә ниҙә бер тикшереү **2.** эпизодик; **эпизоди́ческая роль** эпизодик роль

**ЭПИЗООТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *вет.* эпизоотик; **эпизооти́ческие боле́зни** эпизоотик ауырыуҙар

**ЭПИЗОО́ТИЯ** *ж*; *вет.* эпизоотия (*мал-тыуарҙа йоғошло ауырыуҙың киң таралыуы*)

**ЭПИЗООТОЛО́ГИЯ** *ж* эпизоотология (*фән*)

**Э́ПИК** *м* эпик (*эпик әҫәрҙәр авторы*)

**Э́ПИКА** *ж*; *лит.* эпика (*эпик әҫәрҙәр*)

**ЭПИКАРДИ́Т** *м*; *мед.* эпикардит (*йөрәк ауырыуы*)

**ЭПИКУРЕ́ЕЦ** *м* эпикурсы (**1.** *фәлс. эпикуреизм яҡлы кеше* **2.** *күсм. тормоштоң рәхәтен татып, кәйеф-сафа ҡороп ҡына йәшәргә ынтылыусы кеше*)

**ЭПИКУРЕИ́ЗМ** *м* эпикуреизм (**1.** *фәлс. боронғо грек философы Эпикурҙың тәғлимәте* **2.** *кеше тормошоноң мәғәнәһе хис инстинкттарын ҡәнәғәтләндереүҙән, рәхәт йәшәүҙән тора тигән ҡараш* **3.** *күсм. хис ләззәттәренә бирелгәнлек*)

**ЭПИКУРЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое эпикуреизм ...ы, эпикурсы ...ы; **эпикуре́йская филосо́фия** эпикуреизм фәлсәфәһе; **эпикуре́йская шко́ла** эпикуреизм мәктәбе

**ЭПИКУРЕ́ЙСТВО** *с см.* **эпикуреи́зм** 2, 3

**ЭПИЛЕ́ПСИЯ** *ж* эпилепсия, быума, өйәнәк

**ЭПИЛЕ́ПТИК** *м*; *разг.* эпилептик, быумалы, өйәнәкле кеше

**ЭПИЛЕПТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эпилепсия ...ы, быума ...ы, өйәнәк ...ы; **эпилепти́ческая боле́знь** быума ауырыуы; **эпилепти́ческий припа́док** быума тотоу

**ЭПИЛО́Г** *м* **1.** *лит.* эпилог (*әҙәби әҫәрҙә төп геройҙарҙың һуңғы яҙмышын ҡыҫҡаса хикәйәләгән аҙаҡҡы өлөшө*); **эпило́г рома́на** роман эпилогы **2.** *муз.* эпилог, йомғаҡлау; **торже́ственный эпило́г** тантаналы эпилог **3.** *перен.* сиселеш, йомғаҡ, аҙағы; **эпило́г затяну́вшейся исто́рии** оҙаҡҡа һуҙылған ваҡиғаның сиселеше

**ЭПИ́СТОЛА** *ж* эпистола (**1.** *XVIII—XIX бб. әҙәби жанр төрө* **2.** *шутл. сәләм хаты*)

**ЭПИСТОЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое *лит.* эпистоляр; **эпистоля́рное насле́дие писа́теля** яҙыусының эпистоляр мираҫы; **эпистоля́рный стиль** эпистоляр стиль

**ЭПИТАЛА́МА** *ж* эпиталама (**1.** *Боронғо Римда һәм Грецияла никахҡа инеүселәргә ҡотлау йыры* **2.** *әҙ. никахҡа бағышланған йыр, шиғыр*)

**ЭПИТА́ФИЯ** *ж* эпитафия (**1.** *ҡәбер ташына яҙылған яҙма* **2.** *кемдеңдер вафат булыуы айҡанлы яҙылған әҙәби әҫәр*)

**ЭПИТЕЛИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *анат.*, *бот.* эпителий ...ы, эпителиаль; **эпителиа́льная кле́тка** эпителий күҙәнәге; **эпителиа́льный слой** эпителиаль ҡатлам

**ЭПИТЕ́ЛИЙ** *м* эпителий (**1.** *анат. тире-тиресәләрҙе, биҙҙәрҙе һ.б. ҡаплаусы күҙәнәктәрҙән, күҙәнәк араһы матдәһенән торған йоҡа ҡатлам* **2.** *бот. йоҡа күҙәнәк япма*); **эпите́лий дыха́тельных путе́й** тын юлдары эпителийы; **эпите́лий хруста́лика** күҙ яҫмығы эпителийы; **многосло́йный эпите́лий** күп ҡатлы эпителий

**ЭПИ́ТЕТ** *м* **1.** эпитет (*поэтик аныҡлаусы, образдың иң характерлы билдәләрен күрһәтә*); **постоя́нный эпи́тет** даими эпитет; **уда́чный эпи́тет** уңышлы эпитет **2.** (*неодобрительная характеристика кого-чего-л.*) эпитет, ҡушамат; **язви́тельный эпи́тет** мыҫҡыллы ҡушамат

**ЭПИ́ФОРА** *ж*; *лит.* эпифора (*шиғриәттә стилистик алым*)

**ЭПИЦЕ́НТР** *м* **1.** эпицентр, үҙәк (*емергес көстөң тап үҙәгенә тура килгән урын*); **эпице́нтр землетрясе́ния** ер тетрәү эпицентры **2.** *перен.* эпицентр, үҙәк, усаҡ, ҡаҙан; **в эпице́нтре собы́тий** ваҡиғалар үҙәгендә; **эпице́нтр бу́нта** бола усағы

**ЭПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *лит.* эпик, эпос ...ы; **эпи́ческий язы́к** эпос теле **2.** эпик; **эпи́ческая пе́сня** эпик йыр; **эпи́ческая поэ́зия** эпик шиғриәт **3.** тыныс, олпат, сабыр; **эпи́ческий тон** тыныс тауыш; **эпи́ческий о́браз** олпат образ

**ЭПИ́ЧНОСТЬ** *ж* эпиклыҡ, тыныслыҡ, олпатлыҡ; **эпи́чность рома́на** романдың эпиклығы

**ЭПОЛЕ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **эполе́та** *ж* и **эполе́т** *м*) эполеттар (*суҡлы погон*); **золоты́е эполе́ты** алтын эполеттар; **генера́льские эполе́ты** генерал эполеттары

**ЭПОПЕ́Я** *ж* **1.** *лит.* эпопея (*ҙур тарихи ваҡиғалар тураһындағы әҫәр*); **эпопе́я Льва Толсто́го "Война́ и мир"** Лев Толстойҙың "Һуғыш һәм солох" эпопеяһы **2.** *прям.*, *перен.* эпопея, тарих; **наро́дная эпопе́я** халыҡ эпопеяһы; **рассказа́ть це́лую эпопе́ю** тотош бер тарих һөйләү

**Э́ПОС** *м*; *лит.* эпос (**1.** *хикәйәләү формаһында яҙылған әҫәр* **2.** *героик характерҙағы халыҡ йырҙары, поэмалар йыйылмаһы*)

**ЭПО́ХА** *ж* дәүер, заман, осор; **эпо́ха Возрожде́ния** Яңырыу дәүере; **эпо́ха больши́х переме́н** ҙур үҙгәрештәр осоро; **геологи́ческие эпо́хи** геологик осорҙар

**ЭПОХА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое эпохаль, дәүергә торошло; **эпоха́льные собы́тия** эпохаль ваҡиғалар; **эпоха́льное иску́сство** эпохаль сәнғәт

**Э́РА** *ж* **1.** эра (*йылдар иҫәбен башлап алып киткән ваҡыт һәм билдәле бер системалағы йылдар иҫәбе*); **но́вая э́ра** яңы эра (*Ғайса пәйғәмбәр — Христос тыуған йылдан башлана*); **мусульма́нская э́ра** мосолман (һижри) эраһы (*Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Мәккәнән киткән ваҡытынан башлана*) **2.** (*период, эпоха*) дәүер, осор, эра; **а́томная э́ра** атом дәүере **3.** *геол.* эра, дәүер; **палеозо́йская э́ра** палеозой эраһы

**ЭРГ** *м*; *физ.* эрг (*эш берәмеге*)

**ЭРГОНО́МИКА** *ж* эргономика (*хәҙерге заман етештереү шарттарында кеше һәм уның эшмәкәрлеген өйрәнеүсе фән тармағы*)

**ЭРЕ́КЦИЯ** *ж*; *физиол.* эрекция

**ЭРЗА́Ц** *м* (*суррогат*) эрзац; **эрза́ц ко́жи** күн эрзацы

**Э́РЗЯ** *ж собир.* эрзя (*мордва халҡының этник төркөмө*)

**ЭРЗЯ́НЕ** *мн.* эрзялар // *ед.* **эрзя́нин** *м* эрзя ир-аты; **эрзя́нка** *ж* эрзя ҡатын-ҡыҙы

**ЭРЗЯ́НСКИЙ,** -ая, -ое эрзя ...ы; **эрзя́нский язы́к** эрзя теле

**ЭРИТРОЦИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **эритроци́т** *м*); *физиол.* эритроцит (*ҡандың ҡыҙыл күҙәнәктәре*)

**ЭРОДИ́РОВАТЬ** *несов. что*; *геол.* эрозия яһау, йыуыу, ашау

**ЭРО́ЗИЯ** *ж* **1.** *геол.* эрозия, ашалыу, йыуылыу; **ветрова́я эро́зия** ел эрозияһы; **следы́ эро́зии** йыуылыу эҙҙәре; **эро́зия по́чвы** тупраҡтың ашалыуы **2.** *тех.*, *мед.* эрозия; **эро́зия мета́ллов** металл эрозияһы; **эро́зия ко́жи** тире (тән) эрозияһы

**Э́РОС** *м*; *книжн.* эрос, һөйөү

**ЭРОТИ́ЗМ** *м* эротизм, енси хислелек

**ЭРО́ТИКА** *ж* эротика, енси хис, шәһүәт

**ЭРОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое эротик, шәһүәтле, енси; **эроти́ческий фильм** эротик фильм; **эроти́ческое влече́ние** енси ынтылыш

**ЭРОТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **эроти́ческий**

**ЭРУДИ́Т** *м* эрудит (*тәрән һәм киң белемле кеше*)

**ЭРУДИ́ЦИЯ** *ж* эрудиция, киң белем(лелек), тәрән (төплө) белем; **облада́ть эруди́цией** киң белемлелеккә эйә булыу

**ЭРЦГЕ́РЦОГ** *м* эрцгерцог (*принц титулы*)

**ЭРЦГЕРЦОГИ́НЯ** *ж* **1.** эрцгерцог ҡатыны **2.** эрцгерцог ҡыҙы

**ЭСЕ́Р** *м* эсер (*Рәсәйҙә ваҡ буржуазия партияһының ағзаһы*)

**ЭСКА́ДРА** *ж* эскадра (*хәрби-диңгеҙ караптарының йәки хәрби самолёттарҙың ҙур берекмәһе*)

**ЭСКА́ДРЕННЫЙ,** -ая, -ое эскадра ...ы; **эска́дренный кре́йсер** эскадра крейсеры; **эска́дренный миноно́сец** эскадра миноносецы

**ЭСКАДРИ́ЛЬЯ** *ж* эскадрилья (*хәрби авиацияла самолёттарҙың бер нисә звеноһынан торған хәрби берәмек*)

**ЭСКАДРО́Н** *м* эскадрон; **кавалери́йский эскадро́н** кавалерия эскадроны

**ЭСКАДРО́ННЫЙ,** -ая, -ое эскадрон ...ы; **эскадро́нный команди́р** эскадрон командиры

**ЭСКАЛА́ТОР** *м* эскалатор; **подня́ться на эскала́торе** эскалаторҙа күтәрелеү

**ЭСКАЛА́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое эскалатор ...ы; **эскала́торная ступе́нька** эскалатор баҫҡысы

**ЭСКАЛА́ЦИЯ** *ж* эскалация, йәйелеү, көсәйеү, киңәйеү; **эскала́ция войны́** һуғыштың көсәйеүе

**ЭСКАПА́ДА** *ж*; *книжн.* ҡыланыш, ҡылыҡ; **стра́нная эскапа́да** сәйер ҡыланыш

**ЭСКИ́З** *м*; *в разн. знач.* эскиз, һыҙма; **эски́з к карти́не** картинаға эскиз; **каранда́шный эски́з** ҡәләм эскизы; **эски́з скульпту́ры** скульптура һыҙмаһы; **эски́зы но́вых моде́лей** яңы моделдәр эскизы

**ЭСКИ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое эскиз ...ы, **эски́зный прое́кт** эскиз проекты

**ЭСКИМО́** *с нескл.* эскимо; **сла́дкое эскимо́** татлы эскимо

**ЭСКИМО́ССКИЙ,** -ая, -ое эскимос ...ы; **эскимо́сский язы́к** эскимос теле

**ЭСКИМО́СЫ** *мн.* эскимостар, эскимос халҡы // ед. **эскимо́с** *м* эскимос ир-аты; **эскимо́ска** *ж* эскимос ҡатын-ҡыҙы

**ЭСКО́РТ** *м*; *воен.* эскорт (*хәрби һаҡ*); **почётный эско́рт** почётлы эскорт

**ЭСКОРТИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что*; *воен.* эскорт менән алып барыу (оҙатыу); **эскорти́ровать карава́н судо́в** суднолар карауанын эскорт менән оҙатыу

**ЭСКО́РТНЫЙ,** -ая, -ое *воен.* эскорт ...ы; **эско́ртный отря́д** эскорт отряды

**ЭСКУЛА́П** *м*; *ирон.*, *шутл.* (*врач*) эскулап

**ЭСМИ́НЕЦ** *м* (*эскадренный миноносец*) эсминец

**ЭСПАДРО́Н** *м*; *спорт.* эспадрон (**1.** *фехтованиела ҡулланылған тупаҫ ҡылыс төрө* **2.** *шул ҡорал менән спорт ярышы*); **состяза́ния по эспадро́ну** эспадрон буйынса ярыш

**ЭСПЕРАНТИ́СТ** *м* эсперантист (*эсперанто буйынса белгес*)

**ЭСПЕРА́НТО** *с нескл.* эсперанто (*халыҡ-ара яһалма тел*)

**ЭСПЛАНА́ДА** *ж*; *в разн. знач.* майҙан; **эсплана́да кре́пости** *воен.* ҡәлғә майҙаны; **эсплана́да гости́ницы** ҡунаҡхана майҙаны; **зелёная эсплана́да** йәшел майҙан

**ЭССЕ́** *с нескл.*; *лит.* эссе (*әҙәбиәт, философия, йәмғиәт проблемаларын фәнни түгел, иреклe формала һүрәтләгән очерк*)

**ЭССЕ́НЦИЯ** *ж* эссенция; **у́ксусная эссе́нция** һеркә эссенцияһы

**ЭСТАКА́ДА** *ж* эстакада (*юл аша сығыу, йөк тейәү, бушатыу һ.б. өсөн күпер һымаҡ ҡоролма*); **ка́менная эстака́да** таш эстакада

**ЭСТА́МП** *м* эстамп (*күсермә*); **эста́мп карти́ны** картина эстампы

**ЭСТА́МПНЫЙ,** -ая, -ое эстамп ...ы

**ЭСТАФЕ́ТА** *ж* эстафета (**1.** *иҫк. бер-береһен юлда алыштырып торған сапҡындар аша ебәрелгән ашығыс почта һәм шул юл менән килгән хәбәр* **2.** *спорт.* *йүгереү, йөҙөү һ.б. буйынса ярыш төрө*; *ярышта ҡатнашыусылар ҡулдан-ҡулға шартлы нәмә тапшыра*) ♦ **приня́ть эстафе́ту** *у кого кемдәндер* эстафета ҡабул итеү, эшен дауам итеү

**ЭСТАФЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое эстафета ...ы; **эстафе́тная па́лочка** эстафета таяғы; **эстафе́тная по́чта** эстафета почтаһы

**ЭСТЕЗИОЛО́ГИЯ** *ж* эстезиология (*анатомия һәм физиологияның һиҙеү органдарын өйрәнеү бүлеге*)

**ЭСТЕ́Т** *м* и **ЭСТЕ́ТКА** *ж* эстет (**1.** *нәфислеккә, гүзәллеккә табыныусы* **2.** *эстетизм яҡлы кеше*); **чу́ткий эсте́т** иғтибарлы эстет

**ЭСТЕТИЗА́ЦИЯ** *ж* матурлау, ҡупшылау

**ЭСТЕТИ́ЗМ** *м* **1.** эстетлыҡ (*камиллыҡҡа, теүәллеккә, гүзәллеккә ынтылыш*) **2.** эстетизм (*сәнғәттә юғары идеяларҙы, йөкмәткене ситкә ҡуйып, тышҡы матурлыҡҡа мауығыу*)

**ЭСТЕ́ТИКА** *ж* **1.** *филос.* эстетика; **маркси́стская эсте́тика** марксистик эстетика **2.** эстетика, гүзәллек, матурлыҡ; **эсте́тика оформле́ния** биҙәү эстетикаһы; **эсте́тика стихо́в** шиғырҙар матурлығы

**ЭСТЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** эстетик, эстетика …ы; **эстети́ческое воспита́ние** эстетик тәрбиә; **эстети́ческая тео́рия** эстетика теорияһы **2.** эстетик, гүзәллек …ы, матурлыҡ …ы; **эстети́ческие вку́сы** эстетик зауыҡ; **эстети́ческое чу́вство** матурлыҡ хисе

**ЭСТЕТИ́ЧНОСТЬ** *ж* камиллыҡ, матурлыҡ, гүзәллек, нәфислек; **эстети́чность карти́ны** картинаның гүзәллеге

**ЭСТЕТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое матур, гүзәл, нәфис; **эстети́чное исполне́ние та́нца** бейеүҙең нәфис башҡарылышы

**ЭСТЕ́ТСКИЙ,** -ая, -ое эстет(тар) …ы, эстетизм …ы; **эсте́тский кружо́к** эстеттар түңәрәге; **эсте́тское тече́ние** эстетизм ағымы

**ЭСТЕ́ТСТВО** *с см.* **эстети́зм** 2

**ЭСТО́НСКИЙ,** -ая, -ое эстон …ы, Эстония …ы; **эсто́нский язы́к** эстон теле

**ЭСТО́НЦЫ** *мн.* эстондар, эстон халҡы // *ед.* **эсто́нец** *м* эстон ир-аты; **эсто́нка** *ж* эстон ҡатын-ҡыҙы

**ЭСТРАГО́Н** *м* эстрагон (*әрем төрө*)

**ЭСТРАГО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** эстрагон …ы; **эстраго́нный лист** эстрагон япрағы **2.** эстрагон, эстрагондан яһалған; **эстраго́нный у́ксус** эстрагондан яһалған һеркә

**ЭСТРА́ДА** *ж* **1.** эстрада, сәхнә; **больша́я эстра́да** ҙур сәхнә; **выступа́ть на эстра́де** сәхнәлә сығыш яһау **2.** (*искусство малых форм*) эстрада; **арти́сты эстра́ды** эстрада артистары; **теа́тр эстра́ды** эстрада театры

**ЭСТРА́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** эстрада …ы, сәхнә …ы; **эстра́дная ра́мпа** сәхнә рампаһы; **эстра́дная пло́щадь** сәхнә майҙаны **2.** эстрада …ы; **эстра́дный конце́рт** эстрада концерты; **эстра́дное иску́сство** эстрада сәнғәте

**Э́СТЫ** *мн.* (*ед.* эст *м*) **1.** эстар (*боронғо Балтик буйы ҡәбиләһе*) **2.** *уст. см.* **эсто́нцы**

**Э́ТА** *ж мест. см.* **э́тот**

**ЭТА́Ж** *м* ҡат, этаж; **второ́й эта́ж** икенсе ҡат

**ЭТАЖЕ́РКА** *ж* этажерка; **этаже́рка для книг** китап этажеркаһы

**…ЭТА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡатлы", "этажлы" мәғәнәһендә һүҙ яһаусы икенсе өлөшө, мәҫ.*, **многоэта́жный** күп ҡатлы

**Э́ТАК** и *прост.* **Э́ДАК** *нареч.*; *разг.* **1.** ошолай, улай, былай; **поста́вить э́так** былай ҡуйыу; **так и э́дак** улай ҙа былай; **ни так ни э́так** ни улай ни былай **2.** *в знач. частицы* (*примерно, приблизительно*) самаһы, тирәһе, сама менән, яҡынса; **киломе́тров э́дак де́сять** ун километр (саҡрым) тирәһе; **дня э́так два** ике көн самаһы

**Э́ТАКИЙ** и *прост.* **Э́ДАКИЙ,** -ая, -ое *мест.*; *разг. см.* **тако́й** 1, 3, 4; **э́такий весельча́к** шундай шаян

**ЭТАЛО́Н** *м* **1.** эталон; **этало́н ме́тра** метр эталоны; **этало́н килогра́мма** килограмм эталоны **2.** *перен.* эталон, үрнәк, өлгө, ҡалып; **этало́н че́стности** намыҫлылыҡ өлгөһө

**ЭТАЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое эталон; **этало́нный прибо́р** эталон прибор; **этало́нные весы́** эталон үлсәү

**ЭТА́Н** *м*; *хим.* этан (*газ*)

